# БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ ҺҮҘЛЕГЕ

РОССИЯ ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ
УРАЛ БҮЛЕГЕ
БАШҠОРТОСТАН ҒИЛМИ ҮҘӘГЕ
ТАРИХ, ТЕЛ
ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ ИНСТИТУТЫ

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ ҺҮҘЛЕГЕ

ИКЕ ТОМДА

II

Н–Я

МӘСКӘҮ
«РУССКИЙ ЯЗЫК»
1993

ББК 81.2—4
Б 48

Авторҙар: Агишев И. М., Бишев Ә. Ғ., Зәйнуллина Г. Д., Ишмөхәмәтов З. Ҡ., Кусимова Т. Х., Ураҡсин З. Ғ., Яруллина У. М.

Редколлегия: Бишев Ә. Ғ., Бикбулатов Н. В., Ишбулатов Н. Х., Ишмөхәмәтов З. Ҡ., Сәйетбатталов Ғ. Ғ., Ураҡсин З. Ғ., Хөсәйенов Ғ. Б., Юлдашев Ә. Ә., Яруллина У. М.

Томдың редакторҙары: Бишев Ә. Ғ., Ишмөхәмәтов З. Ҡ., Ураҡсин З. Ғ., Яруллина У. М.

Рецензенттар: филология фәндәре кандидаты Әпсәләмов З. З., филология фәндәре докторы Ғарипов Т. М.

Авторы: Агишев И. М., Бишев А. Г., Зайнуллина Г. Д., Ишмухаметов З. К., Кусимова Т. Х., Ураксин З. Г., Яруллина У. М.

Редколлегия: Бишев А. Г., Бикбулатов Н. В., Ишбулатов Н. Х., Ишмухаметов З. К., Саитбатталов Г. Г., Ураксин З. Г., Хусаинов Г. Б., Юлдашев А. А., Яруллина У. М.

Редакторы тома: Бишев А. Г., Ишмухаметов З. К., Ураксин З. Г., Яруллина У. М.

Рецензенты: кандидат филологических наук Абсалямов З. З., доктор филологических наук Гарипов Т. М.

**Башҡорт теленең һүҙлеге: Ике томда/Россия**
**Б 48** **Фәндәр Академияһы. Башҡортостан ғилми үҙәге, тар., тел һәм әҙ. институты.— М.: Рус. яз., 1993**
ISBN 5-200-02117-0 (том II)
**ISBN 5-200-01108-6**

**Һүҙлеккә 55 000 һүҙ һәм фразеологик берәмек һәм шулай уҡ фән, техника һәм сәнғәткә һ. б. ҡараған махсус терминдар, диалекталь һәм иҫкергән һүҙҙәр алынды, уларҙың һәр береһенә аңлатма бирелде, тейешле билдәләр ҡуйылды, әҙәбиәттән, халыҡ ижадынан, хәҙерге матбуғаттан миҫалдар килтерелде.**
**Һүҙлек башҡортса аңлаған бөтә кешеләргә, төрки телдәре буйынса белгестәргә тәғәйенләнә.**

Б $\frac{4602030000-059}{015(01)-93}$ Без объявл. **ББК 81.2—4**

ISBN 5-200-02117-0 (том II)
**ISBN 5-200-01108-6**

© **Издательство «Русский язык», 1993.**

# Н

**Н** [эн] Башҡорт алфавитының ун һигеҙенсе хәрефе.

**НА, на-а, на-на-на** *ҡыу.* Еккән йәки һыбай атты тиҙләтеп ҡыуғанда әйтелә. [*Хафиз:*] *Әйҙә, хайуанкай. На-на!* М. Тажи.

**НАБА́Т** [*рус.*] *и.* Бәлә килгәнде, хәтәр хәлде белдереп, халыҡты саҡырған сигнал; оран. *Набат тауышы. Набат ҡағыу.*

**НАБО́Р** [*рус.*] *и.* **1.** Билдәле бер йәштәге ир-аттың хәрби эшкә алыныуы. *Дәүләтколдоң наборға бара торған йылы килеп еткәйне,.. һалдаттан ҡалдырманылар.* Д. Юлтый.

**2.** *типогр.* Китап-журналдың баҫыр өсөн хәрефкә йыйылыуы. *Китапты наборға биреү.*

**3.** *типогр.* Ташҡа баҫыу өсөн теҙелгән хәрефтәр йыйымаһы. *Наборҙы таратыу.*

**НАБО́РЩИК** [*рус.*] *и.* Типографияла хәреф йыйыусы. *Бер наборщик менән бер печатник тәүге номер газетаны аҙна буйы маташтырҙы.* Б. Бикбай.

**НАВА́ГА** [*рус.*] *и.* Трескалар ғаиләһенә ҡараған диңгеҙ балығы.

**НАВИГА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Навигация (3 *мәғ.*) белгесе.

**НАВИГАЦИОН** [*рус.* навигационный] *с.* Навигацияға мөнәсәбәтле.

**НАВИГА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Караптар, пароходтар йөрөшө. *Навигация планы.*

**2.** Караптар йөрөүгә яраҡлы осор (урындағы тәбиғәт шарттары менән билдәләнә). *Навигация осоро. Навигацияға әҙерләнеү.* ■ *Миңлегәли навигация тамамланғас ауылына ҡайтты.* Ә. Ихсан.

**3.** Тейешле ҡорамал һәм ҡулланмалар ярҙамында караптарҙы кәрәкле йүнәлештә алып барыу ысулдарын өйрәнгән фән. *Навигация атласы. Навигация дәреслеге. Навигация ҡорамалдары. Практик навигация.*

**НАВО́ДЧИК** [*рус.*] *и.* Тупты тоҫҡап атыусы. *Наводчик Ғәзиз Ҡотлобаев беренсе снарядты уҡ колоннаның уртаһына төшөрҙө.* Ә. Ихсан.

**НАГА́ЙКА** [*рус.*] *и.* Ҡыҫҡа ғына ҡайыш ҡамсы. *Офицер әйәр өҫтөндә һикерерә.., нагайкаһын болғап, бойороҡтар бирә.* Я. Хамматов.

**НАГА́Н** [*рус.*] *и.* Барабаны әйләнеп тормалы, махсус системалағы револьвер. *Наган көбәге. Наган патроны. Нагандан атыу.* ■ [*Зыков*] *наган барабанындағы буш гильзаларҙы алып ташлап патрон тултырҙы.* С. Ханов.

**НА́ГЕЛЬ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ағас ҡоролмаларҙың төрлө өлөшөн бергә беркетә торған ағас йәки тимер шына, сөй. *Бер көндө үткер балта менән ағас ҡаҙау — нагелдәр юныи .. торған Хәлимә эргәһенә Бикә килде.* Ғ. Ғүмәр.

**НАГИҺАН** [*фарс.*] *р. иҫк. кит.* Ҡапыл. *Юлда (ҡайтҡанда ауылға) сауҡалыҡтан нагиһан сыҡты ла китте .. ялт итеп бер аҡ ҡуян.* Ш. Бабич.

**НАГРА́ДА** [*рус.*] *и.* Ниндәйҙер уңышлы эш, ҙур хеҙмәт, күрһәткән батырлыҡ өсөн бирелгән орден, миҙал һ.б. *Хөкүмәт наградаһы.* ■ *Блюхер .. күкрәгенә бронза миҙал ҡаҙай. Был иһә Лотфулланың беренсе наградаһы була.* И. Нигмәтуллин.

**НАГРАДЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **наградлау.** *Почёт грамотаһы менән наградланыу.* ■ *Йәмәғәт тәртибен һаҡлауҙа .. халыҡ дружинниктары ҡыйыулыҡ һәм батырлыҡ күрһәтә. Уларҙың күбеһе орден һәм миҙалдар менән наградланды.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 29 ғинуар.

**НАГРАДЛАУ** *ҡ.* Награда биреү, награда менән бүләкләү. *Орден менән наградлау. Алтын миҙал менән наградлау.*

**НАГРУ́ЗКА** [*рус.*] *и.* Вазифаға ҡарап билдәләнгән эш күләме, шөғөллөк кимәле. *Ҙур нагрузка. Нагрузка биреү.* ■ [*Сәйҙел:*] *Ошо йәштән бала үҫтереү — артыҡ нагрузка ул муйынға.* Ғ. Сәләм. / *күсм.* Нимәнең дә булһа идея, эстәлек яғынан билдәләнеше (сәнғәт, әҙәбиәт әҫәрҙәренә ҡарата). [*Образдарҙың*] *байтағының әҫәрҙә нагрузкалары ла һиҙелмәй.* С. Сафуанов.

**НАҒАСЫ** *и.* **1.** Әсәһенең төп йортона барып үҫкән бала (үҙ атаһының йортондағы туғандары өсөн).

**2.** Әсә яҡ туғандары (бала өсөн).

**НАҒЫШ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Уйып, һырлап, төрлө төҫкә буяп яһалған биҙәк. *Нағыш төшөрөү. Нағыш һалыу. Ташҡа нағыш уйыу.*

**2.** Сигеп төшөрөлгән биҙәк. *Ҡыҙҙар ҙа, беҙҙең кеүек, ат әйәрләп, төрлө нағыш менән биҙәлгән сергетыш һалып менгән.* Ш. Шәһәр. *Сыра яҡтыһында нағыш сигеп, думра һуғып, ҡумыҙ сирткәндәр артта ҡалды.* М. Кәрим.

**3.** Сигелгән нәмә. *Нағыш күп булдымы — тимәк, ул өйҙөң килене йәки ҡыҙҙары уңған. Төрлөсә ҡайып эшләнгән һарауыс тиһеңме, таҫтар башы тиһеңме .. — барыһын да табаһың.* К. Мәргән.

● *Еңгәм сәнсә, мин тотам — мин дә нағыш беләмен.* Әйтем. *Килен малы — нағыш, башы — һағыш.* Мәҡәл.

**НАҒЫШЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **нағышлау.** [*Егеттең*] *әйәр-өпсөнө лә йылҡылдап торған фирүзә ҡашлы шау көмөштән генә нағышланған икән.* «Зөһрә менән Алдар».

**НАҒЫШЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **нағышлау.** *Нагышлатып кейеҙ баҫтырыу.*

**НАҒЫШЛАУ** *к.* **1.** Биҙәк (1 *мәғ.*) төшөрөү; биҙәү. *Карҙар ебәргәндер Уралым, Кремль янындағы шыршыны нагышлаһын, тиҙер, могайын.* К. Кинйәбулатова.

**2.** Сигеп биҙәк төшөрөү; сигеү. *Кара кырпыу үҫлегеҫде нагышларбыҙ, юргам* (Халыҡ йырынан).

**НАҒЫШЛЫ** *с.* **1.** Биҙәк (1 *мәғ.*) төшөрөлгән; биҙәкле. *Нагышлы кейеҙ.*

**2.** Сигеп биҙәлгән; сигеүле. *Нагышлы ла билбау быуҙынйһәң, буяуҙары кальр билеҫдә* (Халыҡ йырынан).

**НАҒЫШСЫ** *и.* Нағыш сигеүсе.

**НАДЕЛ** [*рус.*] *и.* Революциянан элекке заманда крәҫтиән ғаиләһенә файҙаланыу өсөн бүлеп бирелгән ер. *Тулы надел. Надел ере.* ■ *Мырҙаш атаһынан калган ике душ надел ерен биш йөҙ һумга һатып, сауҙага тотонгас, эштәре яйланып, байыга башла*[*ны*]. Д. Юлтый.

**НАДЗИРАТЕЛЬ** [*рус.*] *и.* Революцияға тиклемге Россияла: ҡарауыллап, күҙәтеп тороусы; күҙәтсе, һағауыл. *Полиция надзирателе.* ■ *Камерала дауыл купкандай булды. Камера тышында торган надзиратель тауышына ла иғтибар итеү юк ине.* Я. Хамматов.

**НАДЗОР** [*рус.*] *и.* **1.** Һаҡлау һәм күҙәтеү өсөн тәғәйенләнгән ҡарауыл; бағауыл, һағауыл. *1911 йылдан алып Ғафуриҙы полиция надзоры аҫтына алалар.* К. Мәргән. / *юр.* СССР дәүләт органдарының социалистик законлылыҡты һаҡлауға йүнәлтелгән эш формаһы. *Прокурор надзорының енәйәтте иҫкәртеүгә йүнәлешен көсәйтергә кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1987, 15 ғинуар.

**2.** Күҙәтеүселәр төркөмө; күҙәтеп, тикшереп торған орган. *Техник надзор. Йәмәгәтселек надзоры. Һунарсылыҡ надзоры.*

**НАДИР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Һирәк осраған; һирәк. [*Хәлимә:*] *Фәрештә кеүек пак, күркәм холоҡло, йөҙө йыһанда надир, һүҙе мөләйем булган ун алты йәшлек шәкерттең мине һөйгәненә һөйөндөләр.* А. Таһиров.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**НАДИРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Һирәк осрай торған нәмә.

**2.** Көлкөлө, ҡыҙыҡ нәмә.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**НАДСМОТРЩИК** [*рус.*] *и.* Күҙәтеп тороп эшләтеүсе; ҡараусы.

**НАДСТРОЙКА** *и. кар.* **өҫкормa.**

**НАҘ** [*фарс.*] *и.* **1.** Рәхәтлек биргән, иркәләгән йылы, йомшаҡ тойғо. *Йөрәк наҙы.* ■ *И, һайрай, һайрай һандугас, .. күпме наҙ телендә.* М. Кәрим. *Рәбиғәнең матур тауышы .. наҙы менән аулап ала ир-шаһбазды.* Ш. Бабич.

**2.** Йылы, йомшаҡ мөнәсәбәт, иркәләү. *Ата--әсә наҙы күрмәй үҫкән Миҙхәт .. бисәһенә аруҡ эҫенеп өлгөрғәйне инде.* Н. Мусин.

**3.** Яҡшынан-яҡшыны көҫәгән иркәлек. [*Хан кыҙы:*] *Алпамыша батыр, курайыңды тартһана .. кыҙҙар күңелен күрһәнә.* [*Алпамыша:*] *Хан кыҙының наҙы бөтмәҫ, күңелемдең көйө юк.* «Алпамыша».

● *Кыҙлы кыҙын һөйләгәндә, кыҙһыҙ кыҙлының наҙын һөйләр.* Мәҡәл.

**НАҘАН** [*фарс.*] *с.* **1.** Уҡый-яҙа белмәгән, хәреф танымаған. *Бында* [*ауылда*] *наҙан, күҙе кара танымаған ярлылар.., күбеһе дингә, өшкөрөү-төкөрөүгә ышана.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Уҡымышы бәләкәй, белеме әҙ. *Артта тиҙәр беҙҙе, наҙан тиҙәр. Кем гәйепле быга, беҙме ни?* Т. Йәнәби.

**НАҘАНЛЫҠ** *и.* Уҡый-яҙа белмәгәнлек, наҙан булған хәл. *Аңгыра айыуҙан Уралдагы куркҡандай, эй, туғандар наҙанлыктан куркыу кәрәк.* Аҡмулла. *Кемдәрҙе һуң таҙартманы кала наҙанлыктан, тормош сүбенән.* Ғ. Сәләм.

**НАҘИР** *с. диал.* Сейле-бешле. *Еләк бында наҙир гына.*

**НАҘЛАНЫУ** *к.* **1.** Йылы, йомшаҡ хискә бирелеп, иркәләнеү. *Эйе, сәскәләр һәр яңы көндө керпектәрен асып каршылай ҙа, кояш нурына наҙлана.* Н. Мусин. *Минең тагы ла аҙырак наҙлангым, һөйгәнемдең косагында иркәләнгем килә.* Ф. Әсәнов.

**2.** Иркәләнеп, яҡшынан яҡшыны көҫәү; һайланыу, талымлау. *Ашарга булһа наҙлана, теләй бал да май гына.* Ә. Вахитова.

**3.** Нимәнелер эшләмәй ялындырыу, инәлтеү. [*Старшина:*] *Йә, Карлугас, яусылата ебәргәндә килмәйенсә наҙландың.., бына инде кауыштык.* Б. Бикбай.

**НАҘЛАНЫШЫУ** *к. урт. кар.* **наҙланыу.** [*Сәскәләр*] *япрак аҫтарынан наҙланышып, иркәләнеп кенә карайҙар.* Ш. Бабич.

**НАҘЛАУ** *к.* Йылылыҡ күрһәтеү, ҡәҙерләү, иркәләү. [*Сәрүәр:*] *Мамык түшәктәр һалырмын, аҫыл юргандар ябырмын, наҙлармын, егет, һөйөрмөн, тик бир генә башмагымды.* Х. Ибраһимов. *Айҙан төшкән шәлкем-шәлкем нурҙар наҙланы ла беҙҙең сәстәрҙе.* З. Ҡотлогилдина.

**НАҘЛЫ** *с.* **1.** Йомшаҡ, иркә, нәфис. *Наҙлы бала. Наҙлы һүҙ.* ■ *Бер-береһенә куйып наҙлы башын гөлдәр йоклай ине түтәлдә.* М. Кәрим.

**2.** Яҡшынан яҡшыны көҫәгән, иркә. [*Хөсәйен:*] *«Сей ауыҙ малайҙарҙы мин .. егеткә лә һанамайым» тигән кыҙмы?* [Исмәғил:] *Шул, беҙҙең наҙлы коҙаса, минең агайҙы күҙгә элгән.* Һ. Дәүләтшина.

● *Наҙлы наҙлангансы, наҙһыҙ ашап туйган.* Мәҡәл. *Ярлы булһаң да, наҙлы бул.* Әйтем.

**НАҘЛЫЛЫҠ** *и.* Наҙлы кешегә хас сифат. *Сәхибә туташтың бөтә йөрөш-торошонда, кыланышында иркәлек, наҙлылык сагылып тора.* З. Биишева.

**НАЕЗДНИК** [*рус.*] *и.* Ат йөрөтөүсе.

**НАЖАТ** *и. кар.* **нәжәт.**

**НАЖДАК** [*рус.* ⟨ *төрк.*] *и.* Металл, быяла, таш шымартыу һәм металдан эшләнгән нәмәләрҙе таҙартыу өсөн ҡулланылған онтаҡ минерал. *Наждак кагыҙы. Наждак менән таҙартыу.*

**НАЗАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Нимәгәлер йүнәлтелгән күҙ ҡарашы.

**2.** Ниҙер хаҡындағы фекер; ҡараш. *Хөсүсән, яһил халык назарында, үҙең һимеҙ, корһагың өлкән булһын.* Аҡмулла.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

◆ **Назар ҡайтыу** күңел ҡайтыу, дәрт һүнеү. **Ноҡтаи назар** *ҡар.* **ноҡтаи.**

**НАЗАРАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Күҙәтеп тороу, ҡарау эше.

**2.** Эш башында торған идара; идаралыҡ. ■ [*Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев*] *1880 йылда Өфөгә килә һәм диниә назаратына тәржемәсе булып эшкә урынлаша.* З. Шәрҡи.

□ **Назарат итеү** күҙәтеү, тикшереү.

**НАЗАРИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Теоретик. *Беҙҙә лә экренләп киңәйә барған орлоҡ үрсетеү мәсьәләһендә назари һәм ғәмәли эш башланды.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**НАЗАРИАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Теория.

**НАЗАРИЯ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **назариат.**

**НАЗИМ** *и. ҡар.* **назымсы.**

**НАЗИР** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Ҡарап, күҙәтеп тороусы; күҙәтсе. *Уларҙың* [*шәкерттәрҙең*] *ҡылығы назирҙар тарафынан бик ныҡ тикшереп торола.* Л. Ғәдилов.

**2.** Мөдир.

□**Назирлыҡ итеү** 1) эште-ниҙе күҙәтеү; 2) мөдирлек итеү, етәкселек итеү.

**НАЗЫМ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Шиғыр. *1902 йылдың яҙына ҡаршы «Ишан шәкерттәренә» тигән назым яҙып тараттым.* М. Ғафури.

□ **Назым ҡылыу** шиғырға һалыу.

**НАЗЫМСЫ** *и. иҫк.* Шағир. *Яссауи — үҙенең күпселек эйәрсендәре һымаҡ коро назымсы түгел, .. ара-тирә булһа ла ябай кеше тойғоһон сағылдырған лирик.* Ә. Харисов.

**НАИБ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Урынбаҫар. *Уның* [*Кирилловтың*] *урынына ҡалып торған наибы Тәвкилев тағы ла яманыраҡ ҡыланды.* Ғ. Ибраһимов.

**НАИЛ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* **1.** Нимәгәлер ирешкән, ниндәйҙер уңышҡа ирешә алған.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

□ **Наил булыу** ирешеү. [*Яҡтығорт:*] *Хөрмәтле Гөл, һеҙҙең мәжлесегеҙгә саҡырылыу шәрәфенә наил булғаным өсөн үҙемде бәхетле һанайым.* М. Фәйзи.

**НАЙ** [*ғәр.*] *и.* Ҡамыш ҡурай, һыбыҙғы. [*Ҡурайсы Дилмөхәмәтовка*] *най бүләк иттеләр. Пакистан халҡының был милли музыка ҡоралы уның өсөн иң ҡиммәтле бүләк ине.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 19 май.

**НАЙҘА** [*фарс.*] *и. иҫк.* Һөңгө. *Ул замандың һөнәрҙәренән булған ат сабыштырыу, уҡ атыу, найҙалар тотоу, көрәшеү кеүек нәмәләрҙең һәр береһендә Заятүләк беренсе булып һанала ине.* М. Ғафури.

**НАЙЫЛДАУ** *ҡ. диал.* Ныйылдау.

**НАКА́З** [*рус.*] *и.* **1.** Теләк, талаптар һәм шулар яҙылған документ. *Депутатҡа наказ.*

**2.** Ил, халыҡ тарафынан кемдер алдына ҡуйылған талап. *Тыуған ил наказын намыҫ менән үтәп өйрәнгән боевой экипаж .. үҙен һынатманы.* «Башҡортостан батырҙары», 1959. *Ярышта еңеп сығырға! — Наказ шул беҙгә бөгөн.* М. Сөндөклө.

**НАКА́Т** [*рус.*] *и.* Махсус ҡорал ярҙамында нимәнеңдер өҫтөнә буяп төшөрөлгән биҙәк. *Миңнуш беҙҙең күршенең .. стенаһына алтын-көмөштән накат һалып та ята.* Ф. Иҫәнғолов.

**НАКИ́ДКА** [*рус.*] *и.* Еңһеҙ киң плащ (тун, бишмәт тышынан кейелә); ябынса. *Брезент накидка. Накидка башлығы.* ■ *Әйтерһең дә, ул шинель өҫтөнән ауыр толоп түгел, ә еңел накидка ғына кейгән ине.* Ә. Вәли.

**НАКЛАДНО́Й** [*рус.* накладная] *и.* Ебәрелә йәки бирелә торған тауарҙарға яҙылған документ. *Накладной биреү.*

**НАҠЫҪ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Кәрәгенән әҙ, тейешенән кәм булған. *Наҡыҫ булыу. // Наҡыҫ тойолоу.* ■ *Урып-һуғыу эше һуҙылды. Былай ҙа наҡыҫ иген эрәм-шәрәм ителде.* Я. Хамматов. *Ҡайһы бер ҡоро йылда бесән ягы наҡыҫ булып китә.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Тейешле үлсәмдән, дәүмәлдән бәләкәй булған, тар (кейемгә ҡарата). *Наҡыҫ күлдәк. Наҡыҫ итеп тегеү. // Наҡыҫ киҫеү. Наҡыҫ күренеү.* ■ *Кейҙем туҙған күлдәгемде.., наҡыҫыраҡ бер аҙ тарыраҡ.* Р. Назаров.

**3.** *р. мәғ.* Тейешле дәрәжәнән кәм, әҙ. *Расцветаева .. башҡортса бер генә һүҙ аңлай, ә Зәбиҙә — русса наҡыҫ белә.* Ғ. Әмири.

◆ **Күҙгә наҡыҫ** күҙгә зәғиф, насар күргән.

**НАҠЫҪАЙЫУ** *ҡ. ҡар.* **наҡыҫланыу.**

**НАҠЫҪЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Тейешле саманан кәмеү; әҙәйеү. *Аҙыҡ-түлек һәм һуғыш ҡоралдары наҡыҫланды, ә ярҙам көтөр ер юҡ.* Я. Хамматов.

**2.** Тейешле үлсәмдән, дәүмәлдән кәмеү; бәләкәсәйеү, тарайыу. *Уға хәҙер ун алты йәш, бүйылы телняшкаһы наҡыҫланып бара.* Н. Ғәлимов.

**НАҠЫҪЛЫҠ** *и.* Нимәлер етешмәгән, наҡыҫ булған хәл. *Мал аҙығына наҡыҫлыҡ. Кейемгә наҡыҫлыҡ.*

**НАЛАН** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Ыңғырашҡан, илаған.

□ **Налан итеү** ыңғырашыу, илау. *Әрәмә араһында: «Тарт!» — тип тартай итә налан.* С. Яҡшығолов.

**НАЛЁТ** [*рус.*] *и.* Көтмәгәндә яһалған һөжүм. *Налёт яһау.* ■ *Башҡорттар ҙа немец пехотаһына ҡыйыу налёттар ойоштора.* Ә. Ихсан.

**НАЛО́Г** [*рус.*] *и.* Дәүләт тарафынан билдәләнеп, предприятие, учреждение, айырым кешеләр һ. б. түләй торған мәжбүри йыйым; һалым. *Буйҙаҡтар налогы. Килемгә ҡарап һалынған налог. Әйләнеш налогы. Налог йыйыу. Налог түләү.* ■ [*Бай:*] *Налогтың һис зыяны беҙгә булмай, уның өсөн мин тауарҙы ҡиммәт һатам.* М. Ғафури.

**НАМ** [*фарс.*] *и. иҫк.* **1.** Исем, ат. *Яндырып быгау, төрмә бинаһын намың ныгыта коммун донъяһын.* Б. Ишемғол.

**2.** Дан, шөһрәт. *Күкрәгең тулһын нам алған шанлы нашандар менән.* Х. Ғәбитов.

**НАМАҘ** [*фарс.*] *и. дини* Мосолмандар тарафынан көнөнә биш башҡарылырға тейешле ғибәҙәт. *Намаҙ ваҡыты. Намаҙға барыу. Намаҙ уҡыу. Намаҙға йөрөү.* **Аҡшам намаҙы** *йәки* **киске намаҙ** ҡояш байығандан күктәге ҡыҙыллыҡ бөткәнгә тиклемге арала уҡыла торған намаҙ. **Ғәйет намаҙы** ғәйет көнө уҡыла торған намаҙ. **Икенде намаҙы** өйлә ваҡыты уҙғандан ҡояш байығанға тиклемге арала уҡыла торған

намаҙ. **Иртәнге намаҙ** таң атҡандан ҡояш сыға башлағанға тиклемге арала уҡыла торған намаҙ. **Йома намаҙы** йома көн бергә йыйылып уҡыла торған намаҙ. **Йәсиғ намаҙы** күктәге киске ҡыҙыллыҡ бөткәндән таң атҡанға тиклемге арала уҡыла торған намаҙ. **Йәстиғ намаҙы, йәстү намаҙы** *ҡар.* **йәсиғ намаҙы. Йыназа намаҙы** мәйет булғанда уҡыла торған намаҙ. **Намаҙ боҙолоу** намаҙ уҡығанда яңылышыу. **Намаҙҙан тороу** йоҡонан иртәнге намаҙ ваҡытында тороу. *Бәләкәй сакта атайым бахыр мине эшкә намаҙҙан торғоҙоп һеләне ҡорота торғайны.* Ғ. Дәүләтшин. **Намаҙ ниәтләү** *ҡар.* **ниәтләү. Нәфел намаҙы** нәҙер әйтеп, теләгән теләк ҡабул булғандан һуң уҡыла торған өҫтәмә намаҙ. [*Сәйф:*] *Бер шулай мәзин менән йәсиғтан һуң, «нәфел намаҙҙарыбыҙ бар», тигән хәйлә менән мәсеттә ҡалдыҡ.* С. Агиш. **Өйлә намаҙы** төш ауа башлағандан һәр нәмәнең күләгәһе үҙе ҡәҙәре ике буй булғанға тиклемге ваҡыт эсендә уҡыла торған намаҙ. **Сәфәр намаҙы** дини кешеләр алыҫ юлға сығыр алдынан уҡый торған намаҙ.

● *Ашы юҡ ураҙа тотҡан, эше юҡ намаҙ уҡыған.* Мәҡәл.

**НАМАҘЛЫҠ** *и.* Намаҙ уҡығанда алға түшәлә торған махсус ябыу. *Аҡ намаҙлыҡ.* ■ *Көндәгесә минең өләсәй, аҡшам тиеп тәһәрәт алды ла, намаҙлығын йәйҙе түрбашына, тиҫбеһен дә һалды алдына.* М. Абдуллин.

**НАМАҘ-НИЯЗ** *и. йыйн. һөйл.* Аллаға ҡылынған ғибәҙәт; доға, үтенес. [*Хәҙрәт:*] *Намаҙ-ниязды ҡалдырмаҫҡа, саҙаҡаларҙы бирергә кәрәк.* И. Насыри.

**НАМАЙЫШ** [*фарс.*] *и. иҫк.* **1.** Демонстрация. *Ул* [*Вәли*], *бара торғас, намайыш яһап йөрөгән халыҡҡа ҡатнашмай, бер яҡ ситтә торған .. «аҡыллы баштарға» осраны.* М. Ғафури. *Иртәгеһен сыҡтыҡ намайышҡа, «Марсельеза» йырлап, беҙ ҡумәк.* Д. Юлтый.

**2.** Тантана. *Ҙур шәһәргә керҙе ҙур шатлыҡ төҫө; яңғыраны шатлыҡ, намайыш алҡышы.* Ш. Бабич.

**НАМДАР** [*фарс.*] *с. иҫк.* Шөһрәтле, данлы. *Беҙ әҙер ҡорбан булырға большевик намдар менән.* Д. Юлтый.

**НАМЕ́СТНИК** [*рус.*] *и. тар.* Алыҫ өлкәләргә батша тарафынан ҡуйылып, уның исеменән идара иткән юғары власть башлығы. *1554-1556 йылдарҙа башҡорт ырыуҙары бер-бер артлы Россия подданныйлығына алыуҙы үтенеп, Ҡазанға, рус батшаһының наместнигына, илселәрен ебәрәләр.* Р. Кузеев, Б. Юлдашбаев.

**НАМЛЫ** *с. иҫк.* Исемле, атлы. *Шунда тыуған, шунда үҫкән башҡорт намлы арыҫлан.* Ш. Бабич.

**НАМ-НӘШАН** [*фарс.*] *и. иҫк.* Ниҙеңдер исеме, билдәһе, эҙе. [*Һәүбән*] *ҡул ситенә барып ҡараған, унда ла нам-нәшан юҡ, тып-тын, ти.* «Аҡбуҙат».

**НАМЫҪ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кешенең үҙен тотошонда, эшендә, тәртибендә ниндәй мораль, этик нормаларға таянып эш итеү нән сығып баһаланған хәле; минлек тойғоһо; ғорурлыҡ. *Намыҫ бит ул кешенең иң яҡшы, иң юғары сифаты.. Намыҫ менән ғорурлыҡ икеһе бер тыуған.* Ғ. Ғүмәр. *Ир намыҫы ил байлығынан да аҫыл.* Н. Иҙелбай. **Намыҫ килеү** минлек тойғоһо уяныу, намыҫланыу. [*Еңгәмде*] *Байым яусылата икән тигән хәбәрҙе ишеткәс үк, минең намыҫ килде.* Һ. Дәүләтшина. **Намыҫҡа ҡул һалыу** минлек тойғоһон рәнйетеү. [*Дошман*] *намыҫыңа ҡул һалһа, аталар ҡаны, тиген. Ғәйрәтеңә ынтылһа, батырҙар даны, тиген.* С. Кулибай. **Намыҫҡа талашыу** минлек тойғоһон тапатмаҫҡа тырышыу. *Аҡназарға икеләнергә юл ҡалманы, ир үлһен дә дан ҡалһын, тине лә, намыҫҡа талашып, ҡунаҡтарын саҡырырға булды.* Ғ. Дәүләтшин. **Намыҫты тапау** минлек, ғорурлыҡ тойғоһон рәнйетеү. **Намыҫҡа тейеү** минлек тойғоһон уятыу. *Үткән йылдарҙың намыҫҡа тейә торған иҫтәлектәре уның* [*Ныязғолдоң*] *асыуын бөгөн тағы ла ҡуҙғатты.* Һ. Дәүләтшина. **Намыҫ һаҡлау** минлек тойғоһон, ғорурлыҡты юғалтмау, абруй-дәрәжәне төшөрмәү.

**2.** Ил, кеше ҡаршыһындағы саф исем; яҡшат. *Аҡ намыҫ.* ■ *Ил намыҫын һаҡлап яуға сығыу — батыр егеттәрҙең бурысы* (Халыҡ йырынан). [*Һыуһылыу:*] *Атай, һинән үтенәм, һаҡла ҡыҙың намыҫын.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». **Намыҫты һатыу 1)** намыҫҡа тап төшөрөү. *Тыуған ерен һаҡлаған, ир намыҫын һатмаған батыры бар был илдең* (Ҡобайырҙан); **2)** яуаплылыҡ хисен, оятты юғалтыу. [*Салауат Екатерина II-гә:*] *Намыҫ һатып алған йән кәрәкмәй миңә.. Ошо ташҡа һал да хәҙер саптыр муйынымды.* М. Кәрим.

**3.** Күңел инсафлылығынан килгән яуаплылыҡ тойғоһо, оятлыҡ хисе, выждан. *Намыҫ ҡушыу. Намыҫ белеү.* ■ [*Ғилманов:*] *Үлектәр терелеп дошманға аяҡланған сакта тере көйө тик ятырға намыҫ ҡушмай.* С. Ҡудаш. *Беҙҙең тормош һөйә намыҫ менән саф көс һалған таҙа хеҙмәтте.* Д. Юлтый. **Намыҫҡа көс килтереү** выждан ҡушмаған эш ҡылыу, намыҫҡа ҡаршы килгән эш ҡылыу. *Яуап бир һин көс килтермәй намыҫыңа: ниндәй биҙәк, ниндәй ҡеүәт өҫтәнең һин замананыңа?* М. Кәрим.

**4.** *иҫк.* Ҡанун, ҡағиҙә.

□ **Намыҫ итеү** намыҫланыу.

◆ **Намыҫҡа барыу** *ҡар.* **намыҫланыу.**

**НАМЫҪЛАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Кемдеңдер намыҫына тейеү, минлек тойғоһон уятыу. *Кешене намыҫландырып эшкә дәрт уятыу.*

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **намыҫланыу 1.** [*Фатима:*] *Аҡса эшләп йөрөйһөң икән, ә ниңә уны минән йәшерҙең?* [*Ҡадир:*] *Намыҫландыра бит, алтыным, һиңә белдерге килмәне.* Б. Бикбай.

**НАМЫҪЛАНЫУ** *к.* **1.** Минлек тойғоһон алға ҡуйыу. *Намыҫланып эшләү.* ■ [*Түрәбай Ҡолморҙаға:*] *Ни тиклем намыҫланмағыҙ, барыбер бер ни ҙә сығара алмаҫһығыҙ.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Минлек тойғоһона тейгәнгә әрнеү; ғәрләнеү. [*Айһылыу — Юлайға:*] *Көнләшә тип уйлама. Юҡ!.. Мин тик ғәрләнәм. Намыҫланам. Һин минең кешелегемдән көләһең.* С. Мифтахов. *Бөрйәндәр сит ырыу кешеһенең .. түрәлек иткәненә бик намыҫланған.* С. Галин.

**НАМЫҪЛЫ** *с.* **1.** Минлек тойғоһо көслө; ғорур. *Үҙең намыҫлы булғанда ғына башҡаларҙан намыҫлы булыуҙы талап итеп була.* Ә. Бик-

чәнтәев. *Намыҫлы ир Бабсактың токомо булып, сит ырыуҙа үҫә бер ҡыпсаҡ бала.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**2.** Яуаплылыҡ тойғоһона, күңел таҙалығына бәйле. Намыҫлы *эш.*

**НАМЫҪЛЫЛЫҠ** *и.* Намыҫлы булыу сифаты. *Мин намыҫлылыҡ, биргән һүҙгә тоғролоҡ хаҡында ла уйлайым.* Ә. Бикчәнтәев.

**НАМЫҪСАН** *с.* Минлек тойғоһо нескә; ғәрсел. *Намыҫсан егет.*

**НАМЫҪҺЫҘ** *с.* Ояла, тартына белмәгән; выжданһыҙ. *Взяточник — иң намыҫһыҙ, иң оятһыҙ кеше ти* [*Ҡәрип*]. Т. Арслан. *Дейеү бәрейен теге кейәүҙәре түгел, Незнайка үлтергәнен белгәс, батша әйтә: «Был кейәүҙәрем намыҫһыҙ булып сыҡты, һин уларҙы үҙең теләһәң нишләт», — ти* (Әкиәттән).

**НАМЫҪҺЫҘЛАНЫУ** *ҡ. һөйл.* **1.** Намыҫты, оятты онотоу; намыҫһыҙға әйләнеү.

**2.** Намыҫһыҙлыҡ күрһәтеү.

**НАМЫҪҺЫҘЛЫҠ** *и.* Намыҫһыҙ булыу сифаты. *Яҡындағы .. урынды алып бөткәндәр. Түргә табан үтке килмәй, әллә нисек намыҫһыҙлыҡ булыр төҫлө.* К. Мәргән.

**НАМЫҪҺЫНЫУ** *ҡ.* Намыҫҡа, оятҡа һанау. *Ул* [*Биктимер*] *үҙ ҡулы менән был һүҙҙәрҙе яҙырға намыҫһынды.* Ф. Иҫәнғолов.

**НАМЫҪҺЫРАУ** *ҡ.* Намыҫһыныу. *Сәләх Солтанович ғаилә мәжлестәрендә намыҫһырап тора торған кеше түгел.* Ш. Насыров.

**НАМӘ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Яҙылған яҙыу, яҙылған нәмә. *Почта тип хөкүмәт, йәмғиәт һәм хосуси кешеләрҙең намәләрен йөрөткән ойошмаға әйтелә.* Ғ. Ғисмәти.

**НАН** [*фарс.*] *и. кит.* Икмәк. *Арыҡтарҙа тамам һыу кипте, әсә кукрәгенән һөт китте. «Нан!» — тип һыҙған бала ҡулдары шул һыҙылған көйө буш ҡалды.* М. Кәрим.

**НАНАЙ** *и.* Амур йылғыһының түбәнендә йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (тунгус-манжур телдәренең береһендә һөйләшә). *Нанай халҡы. Нанай ҡатыны. Нанай теле.*

**НАНДУ** [*рус.* < *исп.*] *и.* Өс бармаҡлы, башы менән муйыны ҡауырһынлы Көньяҡ Америка дөйәғошо.

**НАҢ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Оятлыҡ, хурлыҡ. *Ләкин аҙҙым, һаман яҙҙым юлымдан, гөнаһтар эшләнем, наң күтәрҙем мин.* Ғ. Иҫәнбирҙин.

**НАӨМӨТ** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Өмөтһөҙ. *Наөмөт булыу.*

**НАП-** *киҫ.* На- өндәре менән башланған төп сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһен бирә. *Нап-наҡыҫ. Нап-насар.*

**НАПА́ЛМ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Яндырғыс бомба һәм огнеметтар өсөн булған, тиҙ ҡабына торған махсус ҡатышма. *Беҙ гәҙәтебеҙ буйынса йүгереп сығып, траншеяларға боҫтоҡ. Беҙҙең өҫкә напалмы бомбалар яуа башланы. Ике бомба мәктәп өҫтөнә төштө.* М. Кәрим.

**НАПРАВЛЕ́НИЕ** [*рус.*] *и.* Эшкә, дауаланырға, тикшерелеүгә һ. б. ебәргәнде белдергән документ; тәғәйенләмә. *Бына бөгөн уның* [*Мәҙинәнең*] *кеҫәһендә зоотехник дипломы, министерство биргән направление.* Р. Ғабдрахманов.

**НАР** [1] [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Ут, ялҡын. *Күҙҙәрең төпһөҙ, ғаләм, ер, күк, ҡояш, ай унда бар. Унда гөкба.. Унда йәннәт.. Унда ялҡын.. Унда нар!* Б. Мирзанов.

**2.** *кусм.* Тамуҡ.

**НАР** [2] [*ғәр.*] *и.* Бер үркәсле дөйә.

● *Йөк ауырын нар күтәрер.* Мәҡәл.

**НАРАЗИ** [*фарс.*] *с. иҫк.* Риза түгел, ризаһыҙ.

**НАРАЗИЛЫҠ** *и. иҫк.* Ризаһыҙлыҡ. *Уның* [*егеттең*] *күҙҙәре эскә батып, .. бик күңелһеҙ ҡарай, сырайы ла наразилыҡ күрһәтә.* Ә. Таңғатаров.

**НАРАСИ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Сабый бала. *Ҡарғамағыҙ мине, мин тәүфиҡһыҙ, тәүфиҡ табалмаған нараси. Һыҡтатмағыҙ, ҡарғап, мин дә һеҙҙәй,— бер гөнаһһыҙ әҙәм балаһы.* Ғ. Амантай.

**НАРАТ** *и. диал.* Ҡарағай.

**НАРГИЛӘ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Төтөндө һыу аша үткәреп тарта торған төрөпкә.

**НАРЗА́Н** [*рус.*] *и.* Углекислоталы минераль һыу. *Нарзаны мөлдөрәп торған стаканды ҡулыңа алыу менән ауыҙ һыуҙары ҡойолоп китә, стакан эсендәге тәмле һыуҙы тиҙерәк йотоп ебәрге килә.* Н. Ҡәрип.

**НАРКО́З** [*рус.* < гр.] *и.* Дарыу ебәреү арҡаһында айырым тән өлөштәренең йәки бөтә тәндең иҫһеҙләнеүе.

**НАРКО́М** [*рус.*] *и.* Халыҡ комиссары (*ҡар.* **комиссар**). *Тәьминәт эштәре наркомы.*

**НАРКОМА́Н** [*рус.*] *и.* Наркотиктарға әүәҫләнгән кеше.

**НАРКОМА́НИЯ** [*рус.* < *гр.*] *и.* Наркотиктарға әүәҫләнеүҙән барлыҡҡа килгән ауырыу.

**НАРКОМА́Т** [*рус.*] *и.* Халыҡ комиссариаты (*ҡар.* **комиссариат**).

**НАРКО́ТИК** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Иҫертә, йоҡлата, иҫ-һушты алып миңрәүләтә торған көслө матдә (ғәҙәттә медицинала ауыртыуҙы баҫыу өсөн ҡулланыла).

**НАРКОТИ́К** [*рус.*] *с.* Иҫһеҙләндергес матдәләргә мөнәсәбәтле. *Наркотик матдә.*

**НАРО́ДНИК** [*рус.*] *и. тар.* Народниклыҡ яҡлы кеше.

**НАРОДНИКЛЫҠ** *и. тар.* 19 быуаттың икенсе яртыһында крәҫтиән демократияһы идеологияһын сағылдырып, Россияның капитализмға инмәй, крәҫтиән общинаһы аша социализмға килеүе мөмкин тип иҫәпләгән ижтимағи-политик ағым.

**НАРОДОВО́ЛЕЦ** [*рус.*] *и. тар.* Народниктарҙың «Народная воля» исемле йәшерен политик ойошмаһының ағзаһы.

**НА́РТА** [*рус.*] *и.* Эт йәки болан егеп йөрөй торған тар оҙон сана. *Ҡар өҫтөндә нарта шыуған ерҙә, мәңге шаулап торған урманда бер ук бөйөк Ватан төҙөлә.* Р. Ниғмәти.

**НАРЦИ́СС** [*рус.* < *гр.*] *и. ҡар.* **нәркәс.**

**НАРЫҠ** [*фарс.*] *и.* Берәй нәмәнең сифатына, әһәмиәтенә ҡарата белдерелгән фекер; баһа. *Нарыҡ алыу.* ■ *Мин уның* [*Байгужаның*] *был эшенә ни тип тә нарыҡ бирә алманым.* Д. Юлтый.

**НАРЫҠЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **нарыҡлау.**

**НАРЫҠЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **нарыҡлау.**

**НАРЫҠЛА́У** *ҡ.* Нимәнелер әһәмиәте, сифаты яғынан билдәләү; баһалау. *В. И. Ленин Некра-*

*сов поэзияһының гражданлык пафосын бик югары нарыкланы.* Ғ. Әмири.

**НАРЫКЛЫ** *с.* Әһәмиятле, баһалы. *Минһажев иптәш мемуары театрыбыҙ донъяһы өсөн нарыклы булған бер әҫәр.* И. Насыри.

**НАРЯ́Д** [*рус.*] *и.* **1.** Берәй нәмә алыу, ебәреү өсөн яҙып бирелгән йәки телдән әйтелгән эш күрһәтмәһе. *Наряд яҙыу.* ■ *Данир наряд буйынса тейешле комбикормды тулыһынса алды.* Я. Вәлиев. *Склад мөдире минең нарядты карап сыкты ла кире бирҙе.* З. Хисмәтуллин. / Үтәлергә тейешле эштең асылын күрһәткән һәм эш хаҡы түләүгә сығанаҡ булған ҡағыҙ. [*Шамил:*] *Бына һеҙгә задание. Нарядта күрһәтелгәнсә, китап иртәгә кискә йыйылып бөтөргә тейеш.* Х. Мохтар.

**2.** Хәрби хеҙмәткәрҙәргә хеҙмәт буйынса ҡушылған эш; нәүбәт. *Нарядта булыу.* ■ *Беҙҙең рота һалдаттары .. окоп ҡаҙырға йөрөгән вакытта, беҙҙе улардан айыралар, икенсе бер наряд бирәләр.* Д. Юлтый.

**3.** Эшкә тәғәйенләнгән хәрби хеҙмәткәрҙәр төркөмө. *Пограничниктарҙың төнгө нарядтары һәм дозорҙары гәжәп бер күк күренешенең шаһиттары булдылар.* Я. Вәлиев.

**НАС** [*фарс.*] *и. кар.* **насыбай.**

**НАСАР** [*фарс.*] *с.* **1.** Тейешле талаптан, ыңғай баһанан түбән сифатлы; *киреһе* яҡшы. *Насар арба. Насар ат. Насар кейем. Насар нәмә. Насар өй. Насар булыу. // Насар кейенеү. Насар эшләү. Насар яктыртыу. Насар яҙыу. // Насарға һанау.* ■ *Куперҙең теге ягында ауыл, ти... Купере бик насар, емерелергә генә тора, ти* (Әкиәттән). *Һыуҙың киңлеге биш сажиндан артык юк, ләкин сыға торған ягы насар, .. һаҙлык.* Д. Юлтый. / Үҙ эшендә тәжрибәһе булмаған, оҫталығы етмәгән. *Насар етәксе. Насар врач.* ■ [*Рәшиҙә:*] *Һеҙҙеңсә, Сәгиҙә Хәсәновна, быгаса Мансурҙы укыткан укытыусы насар укытыусы булып сыга инде.* М. Тажи.

**2.** Мораль яҡтан яман, кире сифаттары булған, боҙоҡ. *Насар кеше. Насар гәҙәт. // Үҙеңде насар тотоу. Насар кыланыу.* ■ *Поручик Алексакин бик насар кеше икән. Ул кыҙҙарга бәйләнә.* Д. Юлтый. [*Эткол бай:*] *Былтыр .. Өмөтбайҙы ошаксы, насар итеп халыкка күрһәтергә тырышыуым бушка гына ине, тип беләһеңме әллә.* Ғ. Дәүләтшин. / Ыңғай булмаған, кире эстәлекле, яман. *Насар ниәт. Насар уй. Насар мөгәмәлә. // Кеше турaһында насар уйлау.* ■ [*Юламан карт:*] *Ярай, теге вакытта мин, Зөлхизәнең күңелендә уҙ эсәһенә карата насар караш уянмаһын тигән теләк менән, уның .. касып китеүен әйтмәгәнмен.* З. Биишева. [*Йәштәр*] *артист булырга, яҙыусы, художник булырга тырышалар. Был насар түгел.* С. Агиш.

**3.** Ауыр тәьҫир ҡалдырған, күңелһеҙ. *Насар төш. Насар кәйеф.* ■ [*Әбей — батшага:*] *Бик насар хәбәр, иллә мәгәр насар булһа ла ысын хәбәр алып килдем һиңә* (Әкиәттән). / Ауыр, ҡыйын. *Насар тормош.* ■ *Бер ук ата-әсәләренә еткер, кыҙҙарының хәле насар.* Һ. Дәүләтшина. *Был урында һыу ягы насар тиҙәр. Был тирәлә аккан йылга ла кул дә юк.* Д. Юлтый.

**4.** *и. мәг. һөйл.* Белемдең, тәртиптең түбән кимәлен билдәләгән баһа. *Насар алыу. Насар куйыу.*

◆ **Насар күреү** 1) ыңғай баһаламау, яҡшыға һанамау; 2) хөрмәт итмәй, яратмай ҡарау.

● *Насар агас ботакка үҫер.* Мәҡәл.

**НАСАРАЙЫУ** *к. кар.* **насарланыу.**

**НАСАРЛАНЫУ** *к.* **1.** Насарға әйләнеү, насар яҡҡа үҙгәреү. *Күҙ насарлана. Көн насарланды.* ■ [*Гази:*] *Балдыҙ, үҙең дә якшы беләһең, донъя насарлана бара.* А. Таһиров. [*Батша:*] *Кесе кыҙым бик ауырый. Хәле көндән-көн насарлана* (Әкиәттән).

**2.** Үлем хәленә етеү (сирле, ауырыу кешегә ҡарата).

**НАСАРЛАУ** *к.* Насарға сығарыу, насар итеп күрһәтеү; яманлау. *Насарлап һөйләү.*

**НАСАРЛЫҠ** *и.* **1.** Булмыш, сифат яғынан насар булғанлыҡ. *Юлдың насарлыгы.* ■ *Магазиндар араһында үҙенең насарлыгынан, бәләкәслегенән .. оялган һымак әлә-һөлә генә күренгән кооператив лавкаһы ла* [*бар*]. Ғ. Дәүләтшин. / Насар булған хәл, етешһеҙлек. *Миңлебай ҙа, йәш булһа ла, үҙ тормошоноң насарлыгын белгәнлектән, әсәһенең эшкә ашмаган өгөтөнә бер ҙә күңгеһе килмәй.* Т. Йәнәби.

**2.** Килешмәгән, насар эш. *Насарлык эшләү. Насарлыкка өйрәнеү.* ■ [*Карт:*] *Аба, аба бик насарлык кылып ташлаганһың бит, кустым. Бының өсөн халык һине кисермәҫ.* М. Тажи. **Насарлыҡҡа сығыу** *һөйл.* насарға әйләнеү, яман юлға төшөү, аҙыу (кешегә ҡарата).

**3.** Кемгәлер ҡарата эшләнгән насар эш, яманлыҡ, яуызлыҡ. *Бер катлы ябай халык Өйрәнсеккә шунда ук ышанган. Уның насарлыктарын гәфү иткән.* З. Биишева.

● *Ологa колак һалмау — яманлыктың билдәһе, кесене һанга алмау — насарлыктың билдәһе.* Мәҡәл.

**НАСИП** [*гәр.*] *и.* **1.** Яҙмышҡа төшкән өлөш, тәҡдир, күрәсәк. [*Старшина:*] *Йә, Карлугас, яусылата ебәргәндә килмәй наҙландың, насибыңдан касып булмай, бына инде кауыштык.* Б. Бикбай.

**2.** *с. мәг.* Яҙмыш буйынса тәғәйенле, яҙмыш ҡушҡан. *Насип нәмә.* ■ *Беҙгә насип йәрҙәр булһа, улар беҙҙе ташламаҫ* (Халыҡ йырынан).

□ **Насип булыу** өлөшкә тейеү. *Гумер юлын бергә үтергә насип булманы беҙгә.* Ғ. Байбурин. **Насип итеү** (*йәки* **кылыу**) өлөшкә тейҙереү. *Хак тәгәлә насип кылһын һау-сәләмәт кайтырга* (Халыҡ йырынан).

● *Насип аҙык кешене һөйрәй.* Мәҡәл.

**НАСИХ** [*гәр.*] *с. иҫк.* Юҡҡа сығарыусы. *Кайһы мәнсух, кайһы насих — уныһын инде һин айыр.* Ш. Бабич.

**НАСО́С** [*рус.*] *и.* Шыйыҡлыҡты, газды һурыу, ҡыуыу өсөн ҡулланылған машина, аппарат һ. б. *Һауа насосы. Һыу һурҙыргыс насос. Кул насосы. Пожарниктар насосы.*

**НАСТУ́РЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] Әфлисун төҫөндәге эре сәскәле, гөл итеп үҫтерелә торған үҫемлек.

**НАСЫБАЙ** [*фарс.*] *и.* Еҫкәй торған ваҡ тәмәке. [*Тулыбай*] *балсыктан яһаган һикәлтәгә барып ултырҙы ла, ыштан кеҫәһенән насыбайын алып, танауына тултыра башланы.* Ғ. Дәүләт-

шин./Тел аҫтына йәки аҫҡы ирен артына һала торған тәмәке (аҡбур, көл, май һ. б. нәмәләр ҡушып, иҙеп яһала). [*Егет*] *кеҫәһенән саҡсаһын алып, .. һулаҡай ҡулының усына бер семтемдәй насыбай алып, .. аҫҡы ирене менән теше араһына һалып ебәрҙе лә, янған утҡа ҡарап уйға ҡалды.* М. Ғафури.

**НАҪИР** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Сәсмә әҫәр яҙыусы. *Фәхрислам — ярты наҫир, бәхете киткән ярты-нан.* Ш. Бабич.

**НАҪЫР** *и. ҡар.* **наһыр.**

**НАТИК** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Һүҙ, телмәр һөйләүсе.

**2.** Дөрөҫ фекер йөрөтөүсе.

**НАТР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. иҫк.* Натрий окисы.

♦ **Зәһәр натр** *шул уҡ* **каустик сода** (*ҡар.* **каустик**).

**НА́ТРИЙ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Химик элемент, һауала тиҙ окислана торған аҡ төҫтәге йомшаҡ металл. *Натрий берләшмәһе.*

**НАТУ́РА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *ҡар.* **тәбиғәт** 2. *Тәрән хисле, поэтик натуралы Салауат йәштән үк бөтә нәмә менән ҡыҙыҡһынған.* З. Шәрҡи. / Ниндәй ҙә булһа ҡылыҡҡа, тәбиғәткә эйә булған шәхес. [*Наташа*] *бай тәбиғәтле натура, .. намыҫлы уңған ҡыҙ.* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** Һүрәткә, киноға төшөрөү өсөн алынған тәбиғи, ысын өлгө. *Натуранан яҙған һүрәттәр.*

**НАТУРАЛАТА** *р.* Иген, мал һәм башҡа төрлө нәмә менән; аҡсалата түгел; нәмәләтә. *Натуралата түләү.*

**НАТУРАЛИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* 19 быуаттың һуңғы осоронда әҙәбиәт һәм сәнғәттә тәбиғәт фәндәре тәьҫире нигеҙендә барлыҡҡа килеп, донъяны һәм кеше мөнәсәбәттәрен объектив рәүештә сағылдырырға тырышҡан йүнәлеш. *Ғ. Амантай шиғырҙарында, тимер-томор даңғырлауы, сүкештәр сыңҡылдауы кеүек, ул саҡтағы поэзияға хас натурализм элементтары ла юҡ түгел.* Ғ. Зөлҡәрнәев.

**НАТУРАЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* **1.** Тәбиғәтте өйрәнеү өлкәһендә эшләгән кеше. *Йәш натуралист.*

**2.** Натурализм йүнәлешенә эйәргән кеше.

**НАТУРАЛИСТИК** *с.* **1.** Натурализмға мөнәсәбәтле, натурализмға ҡоролған. *Живопистағы натуралистик йүнәлеш.*

**2.** Тормоштағы нәмәне шул көйө күсереп күрһәтеүгә ҡороулы. *Натуралистик рәүешетә күсереү.*

**НАТУРАЛЬ** [*рус.* натуральный] *с.* Тәбиғи булған, ысын; киреһе яһалма. *Натураль күн. Натураль ебәк.*

♦ **Натураль хужалыҡ** үҙ көнөн үҙе күреп, үҙенә кәрәкте үҙе етештерә торған хужалыҡ. **Натураль рәт** бөтөн һандарҙың эҙмә-эҙле рәте [1, 2, 3, 4, 5 һ. б.].

**НАТЮРМО́РТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Бергә ҡуйылған төрлө нәмәне (сәскә, емеш, ашамлыҡ һ. б.) һүрәтләүгә бағышланған һынлы сәнғәт жанры һәм шуны сағылдырған һүрәт. *Натюрморт төшөрөү.*

**НАУА** [*фарс.*] *и. иҫк.* Файҙа. *Илен, телен күрсәп яуға сапмаһа, ирмен тигән ир-егеттән науа юҡ.* Й. Солтанов.

**НАУАЛЫ** *с. иҫк.* Файҙалы. *Науалы эш.*

**НАУГО́ЛЬНИК** [*рус.*] *и. ҡар.* **мөйөшлөк** 3.

**НАУҠАҪ** *и. диал.* Ауырыу, сир.

**НАУҠАҪЛАНЫУ** *ҡ. диал.* Ауырыу, сирләү. *Науҡаҫланып тороу.*

**НАУРУЗ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Иранда ҡояш календары буйынса яңы йыл башланған көн (21 март).

**НАУ́ШНИК** [*рус.*] *и.* Ҡолаҡҡа ҡуйып тыңлау өсөн ҡуш аппараттан торған прибор. *Фәрит приказ көтә .. наушнигын кейеп ҡолаҡҡа.* Я. Ҡолмой.

**НАФИҒ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Файҙалы. *Йософ нәби әхүәлене аһсам, мөьминдәргә нафиғтыр.* «Йософ вә Зөләйха».

**НАФТАЛИ́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡырҡыу еҫле аҡ төҫтәге кристаллик матдә (техник мәнфәғәт өсөн шулай уҡ кейемде көйәнән һаҡлау өсөн ҡулланыла). *Нафталин еҫе.* ■ *Шыйыҡлыҡтар ғына түгел, бәлки ҡаты есемдәр ҙә, мәҫәлән, нафталин менән камфара ла парға әйләнә.*

**НАФТО́Л** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Нафталиндан алынып, буяу эшләүҙә ҡулланылған химик берләшмә.

**НАХАҠ** [*фарс.*] *с.* **1.** Дөрөҫлөккә ҡаршы; буш, ялған. *Бойоғаһың һин дә минһеҙ әллә хаҡ, әллә нахаҡ.* М. Басыров.

**2.** Ғәҙеллеккә ҡаршы; ғәҙелһеҙлек, ялған. *Нахаҡ бәлә яғыу. Нахаҡ һүҙ ишетеү. // Нахаҡ ерләү.* ■ *Ана, нимә һөйләп ята Бикйән!.. О-о, нахаҡ һүҙҙән дә ауыр һүҙ юҡ икән донъяла.* Ғ. Байбурин. *Нахаҡ эштәр менән юялар икән арыҫлан кеүек ирҙең баштарын* (Халыҡ йырынан).

**НАХАҠҠА** *р.* Буштан-бушҡа, ғәйепһеҙгә. *Ниңә кисә батрак Хәлекәйҙе туҡмап үлтергәндәр нахаҡҡа.* Д. Юлтый.

**НАХАҠТАН** *р.* Буштан-бушҡа, ғәйепһеҙҙән. [*Гөлйөҙөм:*] *Был тиклем нахаҡтан рәнйетерҙәр икән. Ғәрлеге ни тора.* Һ. Дәүләтшина.

**НАХИМОВСЫ** *и.* Нахимов училищеһында тәрбиәләнеүсе.

**НАХИӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Административ-территориаль берәмек; өйәҙ, район.

**НАХУШ** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Насар, яман. *Һаҡалдарығыҙ ағарған, һүрәттәрегеҙ хуш, ғаҡылдарығыҙ һануз ағармаған вә һүҙҙәрегеҙ нахуштыр.* «Батыршаның хаты.»

**НАҺЫР** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Теләк, өмөт. *Тилмереп килгән еһерҙең наһырын ергә ормағыҙ.* М. Буранғолов.

♦ **Наһырҙы ҡырҡыу** төрлө ауырлыҡ, ҡыйынлыҡтар менән үҙәккә үтеү (яҙмышҡа, тормош хәлдәренә ҡарата). *Анау тиклем ауыр, наһырҙы ҡырҡҡан мәлдәрҙә лә Иван Якутов, Петр Зенцов кеүек революционерҙар .. һыр бирмәгәндә(р).* Ә. Әхмәткужин. **Наһыр ҡороу** күңел ҡайтыу, өмөт һүрелеү. *Рәтле булһа, атаһы .. бер сараһын күреп һалдаттан ҡалдырыр ине, юҡ, ҡарттың бөтөнләй наһыры ҡороған уға.* Б. Бикбай.

**НАЦИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Герман фашизмы.

**НАЦИОНАЛИЗА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Эре предприятиеларҙың, ерҙең, айырым халыҡ хужалығы тармаҡтарының хосуси милектән дәүләт милкенә күсерелеше. *Национализация яһау.*

**НАЦИОНАЛИЗАЦИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **национализациялау.**

**НАЦИОНАЛИЗАЦИЯЛАУ** *к.* Национализация үткәреү. *Ерҙе национализациялау.*

**НАЦИ́СТ** [*рус.*] *и.* Нацизм яҡлы кеше, герман фашистар партияһының ағзаһы.

**НАЧА́ЛЬНИК** [*рус.*] *и.* Берәй эшкә йәки ойошмаға етәкселек иткән вазифалы кеше; башлыҡ. *Булек начальнигы. Застава начальнигы. Ҡарауыл начальнигы.*

**НАЧА́ЛЬСТВО** [*рус.*] *и. йыйн.* Начальниктар, башлыҡтар.

**НАШАН** *и. иҫк. ҡар.* **нишан.**

**НАШАТЫ́РЬ** [*рус.* ⟨ *гәр.*] *ҡар.* **нишатыр.**

**НАШИР** [*гәр.*] *и. иҫк.* Матбуғат әҫәрҙәрен баҫтырып сығарыусы; издатель. *Бөгөн тыуған йырҙар наширҙарҙың портфелендә донъя күрмәйҙәр.* Д. Юлтый.

**НАЯН** *с. диал.* **1.** *ҡар.* **шаян** 1.

**2.** Хәйләкәр, мут.

**НАЯНЛАНЫУ** *к. диал.* **1.** *ҡар.* **шаярыу** 1. *Егеттәр тәҙрәнән тәҙрәгә барып наянланып йөрөгәндә Шәһиәхмәт күҫәк менән килеп.., ҡыуалап ебәрҙе.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Хәйләләү, мутлашыу.

**НАЯНЛЫҠ** *и. диал.* Шаянлыҡ, мутлыҡ. *Пианино ҡайтарттырҙы өйгә һинең талым, һинең наянлыҡ.* Ш. Бикҡол.

**НАЯТ** [*рус.* на я́ть] *с. һөйл.* Бик яҡшы. *Наят булыу. Наят итеп эшләп ҡуйыу.*

**НЕАНДЕРТАЛЬ** [*рус.* неандерталец] *антроп. и.* Тәүге һәм урта палеолит дәүерендә йәшәгән боронғо кеше.

**НЕВРАЛГИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ниндәй ҙә булһа бер нервының зарарланыуы йәки шешеүенән килеп сыҡҡан ауыртыуҙар.

**НЕВРАСТЕ́НИК** [*рус.*] *и.* Нервыһы ҡаҡшаған кеше.

**НЕВРАСТЕНИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Нерв системаһыҙың ҡаҡшауы (бик тиҙ арыу, баш ауыртыу, бушҡа ғына ярһып барыу кеүек күренештәрҙә сағыла).

**НЕВРИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] Һыуыҡ тейеү, бәрелеү йәки инфекция һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән нерв ауырыуы.

**НЕВРО́З** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ниндәй ҙә булһа эске ағзаның насар эшләүендә, шулай уҡ матдәләр алмашыныуындағы үҙгәрештә сағылған нервы ауырыуы. *Дөйөм невроз. Йөрәк неврозы.* ■ *Невроз менән ауырығанда ниндәйҙер ҡатмарлы дауаланыу, больницаға ятыу йәки эш ташлау кәрәкмәй.* М. Ғатауллин.

**НЕВРОЛОГИК** *с.* Неврологияға мөнәсәбәтле. *Неврологик клиника. Неврологик тикшеренеүҙәр.*

**НЕВРОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Нервы системаһын һәм уның эшмәкәрлеген өйрәнә торған фән.

**НЕВРОПАТО́ЛОГ** *и.* Невропатология өлкәһендә эшләүсе белгес.

**НЕВРОПАТОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Нервы системаһына бәйле ауырыуҙар тураһындағы тәғлимәт. *Невропатология өлкәһендәге тикшеренеүҙәр.*

**НЕГАТИ́В** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Фото пластинкаһында йәки пленкала аҡ нәмә ҡара, ҡара нәмә аҡ булып төшкән һүрәт һәм шул һүрәт төшөрөлгән фотографик пластинка йәки пленка.

**НЕГР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Негроид расаһына ҡараған халыҡ вәкиле исеме (күберәк Европа халыҡтары телендә ҡулланыла). *Негр ҡатыны. Негр ҡәбиләләре.* ■ *Ә бер негр шунда ҡомға баҫып әкрен генә һуҙа уҙ моңон.* Х. Ҡунаҡбай.

**НЕГРО́ИД** [*рус.*] *и:* **негроид расаһы** *антроп.* кешелектең төп расаларының береһе (ҡара тәнле, бөҙрә сәсле, киң танаулы халыҡ).

**НЕДО́ИМКА** [*рус.*] *и.* Йыйым-һалымдың ваҡытында түләнмәгән өлөшө. *Атайымдың: «Йыйыу аксаһы түләйһе, недоимка бирәһе бар»,— тип зарланыуҙары әле лә күҙ алдымда тора.* М. Ғафури.

**НЕДО́ИМЩИК** [*рус.*] *и.* Недоимкаһы булған кеше.

**НЕЙЛО́Н** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Ебәккә оҡшаған синтетик еп һәм шул ептән һуғылған туҡыма. *Аҡ нейлон. // Нейлон күлдәк.*

**НЕЙРО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Нервы күҙәнәге һәм уның бөтә үҫенделәре. *Нервы туҡымаһы нервы күҙәнәктәренән, йәғни нейрондарҙан .. тора.*

**НЕЙРОПСИХОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Психологияның кеше психикаһын үҙәк нервы системаһы эшенә бәйле рәүештә өйрәнә торған бүлеге.

**НЕЙРОХИРУ́РГ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Нейрохирургия өлкәһендә эшләүсе белгес-врач.

**НЕЙРОХИРУРГИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Хирургияның нервы ауырыуҙарын тикшерә һәм уларҙы хирургик юлдар менән дауалау алымдарын өйрәнә торған бүлеге. *Нейрохирургия институты.*

**НЕЙТРАЛИТЕ́Т** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Халыҡ-ара хоҡуҡта: һуғышта ҡатнашмау, ә тыныс ваҡытта — хәрби блоктарға инмәү политикаһы. *Нейтралитет һаҡлау.*

**2.** Кеше араһындағы ыҙғыш-талашҡа, төрлө эш-хәлдәргә ҡарата булған битарафлыҡ.

**НЕЙТРАЛЛӘШЕҮ** *к.* Нейтраль (1, 2 *мәғ.*) хәлдә булыу.

**НЕЙТРАЛЛӘШТЕРЕҮ** *к.* **1.** Нейтраль (1, 2 *мәғ.*) хәлгә килтереү. *Армияны нейтраллаштереү. Дәүләтте нейтраллаштереү.*

**2.** Ниҙеңдер йоғонтоһон, көсөн йомшартыу йәки бөтөрөү.

**НЕЙТРАЛЬ** [*рус.* нейтральный] *с.* **1.** Үҙ-ара һуғышҡан илдәргә ҡарата нейтралитет хәлендәге; битараф. *Нейтраль илдәр. Нейтраль көстәр.*

**2.** Халыҡ-ара килешеү һөҙөмтәһендә һуғыш алып барырға һәм хәрби көстәр урынлаштырырға ярамай тип билдәләнгән. *Нейтраль һыуҙар. Нейтраль территория.*

**3.** Ыҙғыш-талашҡа ҡыҫылышһыҙ; битараф. *Нейтраль кеше. Нейтраль күҙәтеүсе.* / Шундай кешегә хас. *Нейтраль ҡараш.*

**4.** *махс.* Организмға бер төрлө лә тәьҫир итмәгән, файҙаһы йәки зыяны булмаған (төрлө матдә, дарыуҙарға ҡарата).

**5.** *хим.* Һелтеле реакция ла, кислоталы реакция ла бирмәй торған. *Нейтраль иретмә.*

**6.** *физ.* Ыңғай зарядлы ла, кире зарядлы ла булмаған. *Нейтраль өлөшсәләр.*

**НЕЙТРИ́НО** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и. физ.* Заряды булмаған, бик аҙ массалы, электро-магнитик тәьҫиргә бирелмәй торған элементар өлөшсә.

**НЕЙТРО́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. физ.* Атом ядроһы төҙөлөшөндөгө электр заряды булмаған өлөшсә.

**НЕКРОЛО́Г** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Кеше үлгәндән һуң, уның тормошо һәм эшмәкәрлеге хаҡында яҙып сығарылған мәҡәлә.

**НЕКРО́ПОЛЬ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кит.* **1.** Ҡәберлек, зыярат (боронғо Көнсығыш илдәрендә, шулай уҡ боронғо Грецияла һәм Римда).

**2.** Атаҡлы кешеләр күмелгән зыярат.

**НЕКРУТ** [*рус.* рекрут ⟨ *фр.*] *и. иҫк. һөйл.* Хәрби хеҙмәткә яңы алынған кеше. *Некруттар .. алты волостан ғына түгел, бөтә өйәҙҙән йыйылған.* А. Таһиров.

**НЕКТА́Р** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Боронғо грек мифологияһында: аллаларға мәңге йәшлек һәм матурлыҡ килтерә торған эсемлек.

**2.** *бот.* Үҫемлектәр бүлеп сығара торған, сәскәләге татлы һут. *Бал ҡорттары нектар йыя. Донник нектарга бай үлән.*

**НЕ́ЛЬМА** [*рус.*] *и.* Һөмбаштар ғаиләһенә ҡараған затлы балыҡ (төньяҡ йылғаларҙа, диңгеҙҙә була).

**НЕ́МЕЦ** [*рус.*] *и.* Германияның төп халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе (герман телдәренең береһендә һөйләшә). *Немец халҡы. Немец ҡатыны. Немец теле.*

**НЕМЕЦСӘ** *р.* **1.** Немец телендә. *Немецсә һөйләшеү.*

**2.** Немец халҡына хас, немецтәр кеүек.

**НЕ́НЕЦ** [*рус.*] *и.* СССР-ҙың төньяғында Кольск ярымутрауынан Енисейға тиклем территорияла йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (самодий телдәренең береһендә һөйләшә). *Ненец халҡы. Ненец ҡатыны. Ненец теле.*

**НЕОКОЛОНИАЛИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Колониализм бөтөүгә барған шарттарҙа, империалистик дәүләттәрҙең элекке колония һәм ярымколония илдәрҙә экономик, политик, шулай уҡ идеологик өҫтөнлөктө һаҡлауға, йәки уны яңы формаларҙа ҡабаттан булдырыуға йүнәлтелгән политикаһы.

**НЕОКОЛОНИАЛИСТИК** *с.* Неоколониализмға мөнәсәбәтле. *Неоколониалистик политика.*

**НЕОЛИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.*, **неолит дәүере** *археол.* Таш быуаттың иң һуңғы дәүере; яңы таш быуат.

**НЕОЛОГИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. лингв.* Телдә яңы барлыҡҡа килгән һүҙ йәки һүҙбәйләнештәр.

**НЕО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Химик элемент, һауала булған төҫһөҙ һәм еҫһеҙ инерт газ (электр шәмдәренә, яҡтыртҡыс сигнал һәм реклама ҡорамалдарына тултырыу өсөн файҙаланыла). **Неон шәме** неон газы менән яҡтыртҡан электр шәме.

**НЕОНАЦИ́ЗМ** [*гр.* ⟨ *рус.*] *и.* Идеологик һәм политик ағым рәүешендә, яңы политик шарттарға яраҡлаштырылып, яңынан тыуҙырылған нацизм.

**НЕОФАШИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Хәҙерге шарттарға яраҡлы рәүештә эш алымдарын һәм лозунгтарын ғына үҙгәртеп, нигеҙҙә төп идеяһын һәм политикаһын алға һөргән фашизм.

**НЕП-** *киҫ.* **не**- өндәре менән башланған төп сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһен бирә. *Неп-нескә.*

**НЕПТУ́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] (*баш хәреф менән*) *и.* **1.** Боронғо рим мифологияһында диңгеҙ аллаһы.

**2.** *астр.* Ҡояш системаһында Ҡояштан иҫәпләгәндә һигеҙенсе торған планета.

**НЕПТУ́НИЙ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Радиоактив химик элемент, көмөш төҫлө металл.

**НЕ́РВЫ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *анат., физиол.* Баш һәм арҡа мейеһенән таралып, бер система тәшкил иткән, бөтә организмдың эшмәкәрлегенә етәкселек итеүсе нәҙек кенә еп рәүешендәге үҫенде. *Ишетеү нервыһы. Күреү нервыһы. Нервы күҙәнәктәре. Нервы тамырҙары.* ■ *Күп көндәрҙән бире рәтләп йоҡламағанлыҡтан, уның нервылары тамам ҡаҡшаны.* Д. Исламов. **Үҙәк нервы системаһы** баш һәм арҡа мейеләре.

**2.** *күсм.* Эшмәкәрлек үҙәге, эш атҡарыусы төп көс. *Тимер юлды — тормоштоң нервыһы тиҙәр бит.* Б. Бикбай.

♦ **Нервыға тейеү** *шул уҡ* **йәнгә тейеү** (*ҡар.* **йән** 1).

**НЕРВЫЛЫ** *с.* Тиҙ генә ҡыҙып, ярһып китеүсән. *Нервылы кеше.*

**НЕРГЕ** *и. диал.* Селбәрә.

**НЕСКӘ** *с.* **1.** Диаметры, арҡырыһы бик бәләкәй (оҙонса нәмәгә ҡарата); нәҙек; *киреһе* йыуан. *Нескә еп. Нескә таяҡ. Нескә итеп юныу.* ■ *Таш китә асманда атылып, ут һыҙып, нескә нурҙан .. ҡойроҡ һыҙып.* Ш. Бабич. / Тулы һәм һимеҙ булмаған; нәҙек. *Нескә бармаҡ. Нескә бил.* ■ *Индрил нескә буйлы, оҙон кәүҙәле.* Д. Юлтый. *Һин йәнкәйҙе уйлай-уйлай ҡамыштан нескә ҡалдым* (Халыҡ йырынан). / Ҡалын булмаған, тар. *Нескә һыҙыҡ. Нескә генә ҡаш.*

**2.** Юғары, нәҙек (тауышҡа ҡарата). *Урман араһында нескә, шыңғырауыҡлы кешнәүҙәр яңғырап китә.* З. Биишева. *Беседка артында нескә генә көлгән тауыш ишетелде.* Д. Юлтый.

**3.** Күҙгә ташланып бармаған, саҡ ҡына һиҙелерлек; бәләкәй. *Мәғәнә айырмалығы нескә булыу.*

**4.** *күсм.* Бәләкәй генә тәьҫиргә лә һиҙгер; наҙлы. *Нескә күңел. Нескә тәбиғәтле кеше.* ■ *Артыҡ нескә булма, әй һин, бала, нескә гөлдө ҡырау тиҙ ала.* Ҡ. Даян. / Йөрәктән килгән, бик йылы. *Нескә тойғо.* ■ *Һин генә иң нескә хистәр, нескә моңдар шишмәһе.* Ш. Бабич.

**НЕСКӘЛЕК** *и.* **1.** Нескә булыу сифаты. *Ҡылдың нескәлеге.*

**2.** Берәй нәмәгә, эш-хәлгә хас үҙенсәлек, үҙенсәлекле сифат. *Бөтә нескәлектәре менән һөйләп биреү.* ■ *Тыуған телдең моңон, нескәлектәрен бөтә йөрәге менән тойоп, һүҙ байлыҡтарын оҫта ҡулланып ижад итте Ғөбәй Дәүләтшин.* «Ағиҙел», 1968, № 12.

**3.** Йылы тойғо. *Әсәһе Зиннәтте быгаса булмаған әллә ниндәй бер нескәлек менән күкрәгенә ҡыҫты.* З. Ураҡсин.

**НЕСКӘРЕҮ** *ҡ.* **1.** Нескәгә әйләнеү, нескә булыу; нәҙегәйеү. *Нескәреп ҡалыу. Бау ышҡылып нескәрҙе.* ■ *Ҡола ҡашҡаның бауыры ҡыл тартҡан кеүек нескәрҙе.* С. Кулибай.

**2.** Юғары тонлыға әйләнеү; нәҙегәйеү. *Нескәреп ҡалған тауыш.*

3. *кусм.* Тәьҫирләнеү, хискә бирелеү. *Тойго нескәрә.* **Күңел нескәреү** күңел тулып илағы килеү.

**НЕСКӘРТЕҮ** *к.* **1.** Нескә итеү, нескәгә әйләндереү. *Кашты нескәртеү.*

**2.** Юғары тонға күтәреү, нәҙегәйтеү (тауышҡа ҡарата). *Буре телен йоҡартып, тауышын нескәртер өсөн туп-тура тимерсе эҙләп киткән, ти* (Әкиәттән).

**3.** *кусм.* Тәьҫирләндереү, хискә бирелдереү.

**НЕ́ТТО** [*рус.* ⟨ *ит.*] *с., р. сауҙа* Һауытынан башҡа, саф үҙе генә (тауарҙың ауырлығына ҡарата); *киреһе* брутто. *Нетто ауырлыгы. Нетто хакы.*

**НЕФЕЛИ́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡырсынташ, балсыҡ, натрий йәки калий ҡатнаш минерал (ашлама эшләүҙә һәм ҡайһы бер промышленность тармаҡтарында ҡулланыла).

**НЕФРИ́Т** [1] [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Аҡ, йәшкелт йәки ҡара йәшел төҫтәге төрлө нәмәләр яһау, биҙәү өсөн ҡулланылған таш. *Нефрит кашлы йөҙөк. Нефрит кумта.*

**НЕФРИ́Т** [2] [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Бөйөр шешеүе.

**НЕФТЕПРОВО́Д** [*рус.*] *и.* Нефтте йәки нефть эшкәрткәндә алынған продукттарҙы алыҫ урындарға ебәрә торған торбалар системаһы. *«Дуҫлык» нефтепроводы.*

**НЕФТСЕ** *с.* Нефть промышленносындағы эшсе һәм нефть буйынса эшләгән белгес.

**НЕФТЬ** [*рус.*] *и.* Ер аҫтынан сыға торған ҡараһыу төҫтәге май һымаҡ минераль шыйыҡлыҡ; ер майы (яғыулыҡ итеп, шулай уҡ кәрәсин бензин, парафин һ. б. алыу өсөн сырье итеп файҙаланыла). *Девон нефте. Нефть калдыктары. Нефть яткылыктары. Нефть сыгарыу. Нефть эҙләу.* ■ *Нефттең төп өлөшө углерод һәм водород атомдарының химик берләшмәһенән тора.* Д. Бураҡаев.

**НИ** [1] *һор. а.* **1.** Эш-хәл йәки бер нәмә тураһындағы һорауҙы белдерә; нимә? — *Йә, иптәш Фәйзуллин, йомош ниҙә?* С. Агиш. [*Һылыу кортка:*] *Ни һөйләйһең, балакайым? Беҙ кешенән кәм торабыҙҙыр шул.* Т. Йәнәби. *Эскенәйем тулы ай ут яна, һунһен тиһәм бутән ни кала?* (Халыҡ йырынан). **Ни бар** өндәшкән кешегә тауыш биргәндә әйтелә; нимә булған, нимә кәрәк. *Әу, ни бар, балам?*

**2.** Эш-хәлгә йәки берәй нәмәгә ҡарата ниндәйҙер мөнәсәбәтте күрһәткән риторик һорауҙы белдерә; нимә! *Ғәрлеге ни тора!* ■ *Бала кешенең кенәһе ни ҙә үҙе ни!* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Тойғо менән хуплау йәки кире ҡаҡҡанды белдергән риторик һорауҙы аңлата; ниндәй! [*Солтанов:*] *Ни бөтмәгән ревизия ул! Күптән түгел генә тикшерҙек бит.* Б. Бикбай. *Ғишыкланып, утка яныб, кауышмагас ни файҙа* (Халыҡ йырынан).

**4.** Ниҙеңдер күплегенә баҫым яһағанда ҡулланыла; күпме. [*Мәгүзә:*] *Ни әйттем Харис еҙнәңә, ни әйттем. Тыңламаны!* Б. Бикбай.

**5.** Бер нәмә әйтергә уҡталып, әйтә алмай торғанда, һүҙ араһына индерелә. [*Тимербулат:*] *Укытыусы агай әйтә, ни ти: «Эй, Ырыҫбай, .. тапкыр гына баҫып өйрән,» — ти.* Һ. Дәүләтшина.

**6.** Һөйләмдә атап күрһәтелмәгән билдәһеҙ эш-хәл йәки нәмәне белдереү өсөн ҡулланыла; нимә. *Ни бирергә теләһәм, шуны бирер иркем бар.* Р. Ниғмәти. *Кыҙҙар ни әйтергә белмәй аптырап калды* (Әкиәттән). *Бабсак батыр Мәсем ханга килде инде, ни .. кылганын барын һөйләп бирҙе инде.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**7.** *и. мәг.* Билдәләнмәгән исемде белдереү өсөн ҡулланыла; нәмә. *Һәр ни. Ниҙәр генә юк. Ниҙән һүҙ башларга белмәү.* ■ [*Апуш.*] *Яманатымды юйыр өсөн әллә ниемде бирерҙәй булам.* Н. Иҙелбай. *Ак куянкайҙарҙан тун тектерҙем, тышкынайын ниҙән тышлайым?* (Халыҡ йырынан). **Бер** (*йәки* **һис**) **ни** һис бер нәмә, бер нәмә лә. *Бер ни эшләмәй. Һис ни юк һымак.* **Ни нәмә** нимә. **Теләһә ни** кәрәкмәгән ваҡ-төйәк, юҡ-бар нәмә. *Теләһә ни менән булыу. Теләһә ни һөйләү.* / Исемгә өҫтәлеп, йыйнау, көсәйтеү мәғәнәһе бирә. *Кейеме-ние менән. Аксаһыҙ-ниһеҙ.* ■ *«Кем унда һорауһыҙ-ниһеҙ һыу ала?» — тип кыскырган тауыш ишетелгән* (Әкиәттән).

♦ **Был ни был, был ни хәл был, был ни эш был** *кар.* **был. Ни бары** һан-күләмдең аҙлығына баҫым яһай; бөтә булғаны, барлығы. *Ни бары ун минут һөйләштек.* ■ *Юлды быуырга көс етерлек түгел. Ни бары ике гаубицабыҙ.., өс-дүрт пулеметыбыҙ бар.* Ғ. Аллаяров. **Ни була** (*йәки* **булған**) 1) кемдеңдер бер эш-ҡылығына теләк белдергәндә әйтелә. *Бер караһам һиңә, күңелем була, бер йылмайып куйһаң ни була* (Халыҡ йырынан); 2) кемдеңдер фекеренә ҡаршы бер эш-ҡылыҡты аҡлағанда әйтелә.— *Көлһә ни булган, һин кем ул тиклем!* С. Агиш. **Ни булһа ла** бер эш-хәлде кисектермәҫкә, мотлаҡ эшләргә кәрәклеген белдергәндә әйтелә. *Ни булһа ла калмайык, китәйек.* **Ни булһа ла булыр** бер нәмәгә тәүәкәллек итергә йәки бер эш-хәлде үҙ яйына ҡуйырға булғанда әйтелә. **Ни буш** кешенең һүҙен, эш-ҡылығын хуп күрмәгәндә әйтелә. *Ни буш, кешегә һөиләргә ирек бирмәйһең.* **Ни ҙә булһа** берәй нәмә. **Ни етмәне, нимә етмәй** кешенең самаһыҙ эш-ҡылығына ризаһыҙлыҡ белдергәндә әйтелә. *Тора башлауҙарына әле генә, уларга ни етмәй, бер-береһен күреп туя алмаҫ вакыттары бит!* М. Тажи. **Ни етте** булыр-булмаҫ, теләһә ниндәй. *Буҙаның якшы эшләнгәне ни етте һыраңды бәреп йыга ул.* С. Агиш. **Ни етә** бер нәмәне күтәреп маҡтағанда әйтелә. *Айгыр малга ни етә йөрөй белгән кешегә, тыуган илгә ни етә, кәҙерен белгән кешегә* (Ҡобайырҙан). **Ни калған** бер эшкә ҡыҫылыуҙы кәрәк күрмәгәндә әйтелә. *Һиңә ни калган, кыҫылмаһаңсы.* **Ни кәҙәр** (*йәки* **саҡлы, тиклем, хәтле**) һан-күләмдең кимәленә баҫым яһағанда әйтелә. *Ни хәтле кеше.* ■ *Һылыу ни саклы ышанмаҫка тырышып караһа ла, булдыра алманы.* Т. Йәнәби. **Ни тип ни** урынһыҙ һымағыраҡ күренгән һорауға яуап бирер алдан әйтелә.— *Ни эшләнең бөгөн?* — *Ни тип ни, мал караным инде.* **Ни тип** ни маҡсат, ни сәбәп менән; ни өсөн, ниңә. [*Сәгиҙә:*] *Калын бирерлек хәлдәре булмагас, ни тип берәүҙең кинйәһенә йәбешәләр?* Һ. Дәүләтшина. **Ни тиһәң дә** *йәки* **ни әйтһәң дә** нисек кенә булмаһын. [*Булат:*] *Ку-*

*мәк эш ни әйтһәң дә кумәк эш инде ул.* Б. Бикбай. **Әллә ни** 1) күләм-дәрәжәне кәметеп күрһәткәндә әйтелә. *Әллә ни ҙур түгел. Әллә ни кәрәге юк. Әллә ни эш тә юк;* 2) исем, сифат йәки һандың билдәһеҙлеген белдерә. *Әллә ни тиклем. Әллә ни төҫлө. Әллә ни һөйләй.*

● *Тишек колак ни ишетмәҫ.* Мәҡәл.

**НИ** [2] *киҫ.* **1.** Һорау һөйләменә икеләнеү, ғәжәпһенеү төҫмөрө бирә. *Китергә яраймы ни.* ■ [*Карт:*] *Балалар, әле һеҙ быңдамы ни?* М. Тажи. / Риторик һорау аша раҫлау мәғәнәһе бирә. *Иламайым инде һис тә, мин илаҡ малаймы ни! Летчик булаһы кешегә иларга яраймы ни!* Ғ. Әмири. *Ҡыҙҙар ожмах хурҙарымы ни!* Д. Юлтый.

**2.** Бер нәмәгә йәки эш-хәлгә еңел мөнәсәбәт белдергәндә ҡулланыла. *Мин ни, ауыҙга һукмаҫ әле тинем дә, әйттем дә һалдым.* М. Тажи.

**3.** Шарт ҡылым менән билдәләнгән эш-хәлгә ыңғай мөнәсәбәтте белдергәндә ҡулланыла.— *Барһак ни, барырбыҙ шул.* ■ [*Һылыу:*] *Яуын булһа ни, айына бер-ике рәт ҡыуыш ҡороп ятыу ҙур эшме ни?* Т. Йәнәби.

**4.** Хәл ҡылымдың *-ғас* формаһы менән билдәләнгән шартты нығытып, эш-хәлде шуның һөҙөмтәһе итеп билдәләй. [*Хәмдиә:*] *Ауырыгас ни бара алманым.* Һ. Дәүләтшина.

**5.** Алда әйтелгән эш-хәлдең урынлы йә урынһыҙ булыуын билдәләй. *Ултырмай ни, ҡыҫтагас. Юкка тартышып ни.*

**6.** Ҡабатланып килгән саҡта, ниҙең дә булһа әһәмиәтһеҙ икәнен белдерә.— *Ҡайтһа ни ҙә, ҡайтмаһа ни, барыбер түгелме ни?* Р. Низамов. *Кеше менән уртаҡ йәрҙе һөйҙөң ни, һөймәнең ни* (Халыҡ йырынан).

**7.** Барлыҡ менән юҡлыҡ формаһында ҡабатланған ҡылымдан һуң килеп, юҡлыҡ мәғәнәһен көсәйтә.— *Күрҙе, күрмәй ни!* ■ *Бирер, бирмәй ни* [*мулла*], *көтөп тор.* Һ. Дәүләтшина.

**НИ** [3] *терк.* **1.** Ҡапма-ҡаршы ҡуйылған тиң киҫәктәрҙе берләштереү өсөн ҡулланыла. *Декабрь айына тиклем ҡар ямай, ни арба, ни сана булып яткан саҡ ине был.* Н. Мусин.

**2.** Мәғәнә өҫтәп, алдағы әйтелгәнде көсәйтеп килгән һөйләмде бәйләй. [*Гөлйөҙөм:*] *Ошо арала ҡарттайың менән ҡартсәйеңде ҡарай-ҡарай йөҙәнем. Ашарҙарына юк, ни ауырыуҙан баш ҡалҡыта алмайҙар.* Һ. Дәүләтшина.

● *Ни аллаға, ни муллаға.* Әйтем.

**НИВЕЛИР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Урындағы бер нөктәнең сағыштырмаса бейеклеген билдәләү өсөн хеҙмәт иткән геодезик инструмент.

**НИВЕЛИРЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **нивелирлау.**

**НИВЕЛИРЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **нивелирлау.**

**НИВЕЛИРЛАУ** *ҡ. геод.* Урындағы бер нөктәнең билдәләнгән бер нөктә йәки диңгеҙ өҫтө тигеҙлеге менән сағыштырып бейеклеген билдәләү.

**НИВЕЛИРЛАУСЫ** *и.* Нивелир менән эш иткән белгес.

**НИВХ** *и.* Амур йылғаһының тамағында һәм Сахалинда йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (палеоазиат телдәренең береһендә һөйләшә). *Нивх халҡы. Нивх ҡатыны. Нивх теле.*

**НИГЕҘ** *и.* **1.** Һалынасаҡ йорт-биналарҙың урынын нығытыу өсөн эшләнгән аҫҡы ҡоролма. *Нигеҙ бағанаһы. Нигеҙ ташы. Нигеҙ урыны. Өй нигеҙе. Нигеҙ һалыу.*

**2.** Өйҙөң стена буйлап тупраҡ, тиреҫ тултырып, йылылыҡ өсөн кәртәләп йә бурап ҡуйылған өлөшө. *Нигеҙ бураһы. Нигеҙ ситәне. Нигеҙ тупрағы. Нигеҙҙе ныгытыу.*

**3.** Быуын-быуындан донъя көтөп, йәшәп килгән урын, төп йорт. *Ата нигеҙе.* ■ [*Мисбах — улына:*] *Ҡалаға күсеп, ырыу нигеҙен һыуытаһы булма.* Б. Бикбай.

**4.** *күсм.* Берәй нәмәнең төп таянысы, булмышының төп факторы, терәге. *Социаль нигеҙ. Тормоштоң экономик нигеҙе.*

**5.** *күпл.* Ниндәй ҙә булһа фәндең асылын тәшкил иткән төп мәғлүмәттәр. *Марксизм-ленинизм нигеҙҙәре. Дарвинизм нигеҙҙәре.*

**6.** Нимәнеңдер тәбиғәтен, тәртибен билдәләгән төп башланғыс; ысул, юл. *Фәнни нигеҙ.* ■ *Шиғырҙың ритмик нигеҙен пауза, интонация, шиғыр юлы һәм ундағы ижек һаны йәки баҫымдарҙың .. сиратлашып килеүе барлыҡҡа килтерә.* Ғ. Хөсәйенов.

**7.** *мат.* Геометрик фигурала бейеклеккә ҡарата перпендикуляр булған яҡ. *Өсмөйөш нигеҙе. Пирамида нигеҙе. Түбәнге нигеҙ. Үрге нигеҙ.*

**8.** *хим.* Кислоталар менән үҙ-ара тәьҫирләшкәндә тоҙ барлыҡҡа килтерә торған берләшмә.

**9.** *грам.* Һүҙҙең лексик мәғәнәгә эйә булған өлөшө. *Һүҙҙең нигеҙе.*

**НИГЕҘҘӘ** *инш.* Дөйөм алғанда; асылда. *Нигеҙҙә, уның ҡарашы дөрөҫ. Нигеҙҙә, эш хәл ителгән.*

**НИГЕҘЛЕ** *с.* **1.** Төплө дәлилдәр менән ныҡытылған, урынлы, дөрөҫ. *Нигеҙле талап.* ■ *Уларға* [*большевиктарға*] *булған ышаныс нигеҙле ине.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ентекле, ныҡлы, төплө. *Нигеҙле белем. Нигеҙле тикшереү. Нигеҙле итеп, еренә еткереп эшләү.*

**НИГЕҘЛЕЛЕК** *и.* Нигеҙле, урынлы булғанлыҡ. *Талаптың нигеҙлелеге.*

**НИГЕҘЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Билдәле бер урынға йорт һалып ултырыу, төпләнеү. *Олатайҙар Ҡуҡ Иҙелде хуп күреп, шунда нигеҙләнгәндәр.*

**2.** Нимә менәндер иҫбатланыу, дәлилләнеү.

**3.** Нимәнелер дәлил йәки сара итеп таяныу, таянып эш итеү. *Тәжрибәгә нигеҙләнеү.* ■ *Был бит дәүләт сауҙаһы, ул конкуренцияға нигеҙләнмәгән.* С. Агиш.

**НИГЕҘЛӘҮ** *ҡ.* Берәй нәмәне төплө, ышаныслы дәлилдәр, мәғлүмәттәр менән ныҡытыу. *Фекерҙе нигеҙләү. Нигеҙләп аңлатыу.* ■ *1934 йылды яҙыусыларҙың беренсе Бөтә Союз съезында социалистик реализм методын теоретик яҡтан нигеҙләү Совет әҙәбиәте үҫешенә ныҡ ярҙам итте.* Ғ. Хөсәйенов.

**НИГЕҘУТ** *и.* Һары әүернә сәскәле, тетмәкәй япраҡлы ҡый үләне.

**НИГЕҘҺЕҘ** *с.* Тейешле дәлил йәки шарт менән нығытылмаған; ышаныcһыҙ, урынһыҙ. *Нигеҙһеҙ фекер. Нигеҙһеҙ һорау.*

**НИГИЛИЗМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Нығынған дөйөм ҡағиҙә һәм фекерҙәрҙе бер нигеҙһеҙ инҡар итеү, кире ҡағыу күренеше. *Тарихты һанга һукмайынса, әҙәбиәттең айырым факттарын фәкәт бөгөнгө талаптарҙан сығып ҡына баһалау тәнкитселәрҙе .. нигилизмга алып килә.* К. Әхмәтйәнов.

**2.** 19 быуаттың 60-сы йылдарында рус интеллигенцияһы — разночинецтар араһында таралыш алған, дворяндар йәмғиәтенең тәртип-ҡағиҙәләренә, крепостнойлыҡҡа ҡаршы булған йүнәлеш.

**НИГИЛИСТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Һәр төрлө дөйөм ҡағиҙә һәм фекерҙәргә ҡаршы булған кеше.

**2.** Нигилизм (2 *мәғ.*) яҡлы кеше.

**НИГИЛИСТИК** *с.* Нигилизмға мөнәсәбәтле. *Нигилистик ҡараш.*

**НИГРОЛ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҙур механизмдарҙы, тешле тәгәрмәс кеүек нәмәләрҙе майлай торған май (нефттән алына).

**НИГӘ** *р. кар.* **ниңә.**

**НИҒМӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Мул тормошто тәшкил иткән нәмәләр; байлыҡ. *Дүртенсе ҡиммәт нәмә шөкөр тигән, нигмәткә шөкөрһөҙлөк көфөр тигән.* Аҡмулла. *[Дәүләтҡол:] Шөкөр әле, бары менән бай тигәндәй, нигмәт етерлек.* Я. Вәлиев.

**2.** Аҙыҡ, ашамлыҡ. *[Бай ҡыҙҙары] ожмах емештәре кеүек емештәр, ожмах нигмәттәре кеүек нигмәттәр генә ашап үҫә.* М. Ғафури. *Бер генә түрә-ҡара ла түй нигмәтенән ауыҙ итмәй ҡалманы.* Ф. Иҫәнғолов. **Әлүән ниғмәт** төрлө тәмле-татлы ашамлыҡ. *[Батша] Моңҡилмәҫте әлүән нигмәттәр менән һыйлап, ашатып-эсерҙе* (Әкиәттән).

**НИДА** [*ғәр.*] *иҫк. и.* Саҡырыу, өндәү тауышы. *Яңғырата хәҙер ерҙең йөҙөн эшселәрҙең көслө нидаһы.* М. Ғафури.

**НИҘЕР** *билдһ. а.* Ниндәй ҙә булһа бер билдәһеҙ нәмә; әллә нимә; нимәләр. *Ниҙер эшләү. Ниҙер әйтмәк булыу.* ■ *Шафиҡ саҡ ҡына күренмәйерәк торһа ла, Миңлекамалдың эсе бошто. Өйөндә ниҙер етмәгән һымаҡ күренде.* Я. Хамматов. *[Тыңлар батыр] ергә һуҙылып ятҡан да, оҙон ҡолаҡтары менән ниҙер тыңлай башлаган ти* (Әкиәттән).

**НИҘӘ** *һор. а.* Атап күрһәтелмәгән эш-хәл йәки нәмәне белдереү өсөн ҡулланыла; нимәлә? *Ҡотлояр, Юлия менән Айбулатҡа ҡарап: Йә, эш ниҙә ҡалды? — тине.* Һ. Дәүләтшина. *Мәскәй ҡапыл Тамыр батырҙың үңәсенә йәбешкән дә, быуа башлаган. Егет эштең ниҙә икәнен шунда гына аңлап алган* (Әкиәттән).

◆ **Әллә ниҙә бер** һирәк (ваҡытҡа ҡарата). *[Шамай малайы] әллә ниҙә бер ауылга ҡайтып килә.* М. Тажи.

**НИҘӘН** *һор. а. һөйл.* Ниндәй сәбәптән?, ни сәбәпле?

**НИЗАҒ** [*ғәр.*] *и.* Талаш, ыҙғыш, ғауға. *Низаҡ сығарыу.* ■ *Ул баш тигәнебеҙ .. төрлө ил низагтарын тикшереп, хәл итеп килә.* «Алдар менән Зөһрә». **Ер низағы** *тар.* ер өсөн талаш.

□ **Низағ итеү** талашыу, ғауғалашыу, тартышыу.

**НИЗАҒА** *и. кар.* **низағ.**

**НИЗАҒАЛАШЫУ** *к. кар.* **низағлашыу.**

**НИЗАҒЛАШЫУ** *к.* Ҡара-ҡаршы талашыу, ыҙғышыу, ғауғалашыу. *Вәлидовсылар кантисполком башында кем тороу тураһында артыҡ күп низаглашып булашманылар.* И. Насыри.

**НИЗАҒЛЫ** *с.* Ҡаршылыҡлы, бәхәсле, талашлы. *Сәсәндәргә низаглы мәсьәләләрҙе хәл иткәндә лә ҡатнашырга тура килгән.* Ә Харисов.

**НИЗАМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк.* Тормоштағы, эштәге билдәләнгән, урынлашҡан тәртип. *Низамды боҙоу.* ■ *Мәҙрәсәләге хәят һәр көн шулай дауам итә. Ул һис бер үҙгәрмәй торған низам булып әүерелгән.* М. Ғафури. / Әҙәп ҡағиҙәләре нигеҙендә алынған тәрбиә. *[Аллаяр Гөлйөҙөмгә:] Ярар, килен, үҙең бик күркәм низам алған балаһың .. Туҙышып, кеше алдында хур булыша күрмәгеҙ.* Ф. Иҫәнғолов. *Аягүрә тороп ҡунаҡ һыйлай низам күргән ата балаһы* (Халыҡ йырынан).

**2.** Билдәләнгән ҡағиҙә, закон. *Шул арала хөкүмәт әүәлге налогтар өҫтөнә төтөн башынан йәнә бер кәҙәр налог алырга, түйҙарынан пошлина алырга низам сығарҙы.* М. Һаҙыев.

**3.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исәме.

**НИЗАМЛЫ** *с. һир. кар.* **тәртипле.**

**НИЗАМНАМӘ** [*фарс.*] *иҫк. и.* Берәй мәсьәләгә арналған ҡағиҙәләр, закондар йыйынтығы. *[Шәкерт:] Эске низамнамәнең «Шәкерт, мөгәллим үә мөбассир араһындагы мөгәмәлә» тигән бүлегенең 9-сы цифр менән күрһәтелгән ерендә: «Шәкерт мәбассир алдында ике ҡулын түбән төшөрөп туп-тура торор һәм сәләм бирер,» — тиелгән.* С. Агиш.

**НИЗАМӘН** [*ғәр.*] *иҫк. р.* Тәртипле рәүештә, закон буйынса.

**НИЗҒӘ** *и. кар.* **низағ.**

**НИК** *а. диал.* Ниңә.

◆ **Ник тыуҙы** ҡулынан эш килмәгән, бешмәгән (кешегә ҡарата әйтелә).

**НИКАХ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Өйләнешә торған ике араны шәриғәт менән нығытыу йолаһы. *[Ялсыгол — Аҡйегеткә:] Аҡһаҡалдар.., никах боҙоп башҡа менән күңелен аҙҙыра тип, һиңә ләгнәт уҡыйҙар.* М. Кәрим. *[Мулла:] Никахтың дөрөҫмө, түгелме икәнен белеү өсөн, миңә был ҡыҙҙарҙың йөҙөн күрергә кәрәк* (Әкиәттән). **Никах ашы** *йәки* **никах мәжлесе** никах уҡығандан һуң булған һый. **Никах йәше** шәриғәт буйынса ҡаралған, кейәүгә бирергә мөмкин булған йәш. **Никах ҡылыу** *кар.* **никахлау 1. Никах уҡыу** (*йәки* **ҡойоу**) *кар.* **никахлау 2. Никах һыуы** никах уҡығанда мулла алдына ҡуйып, һуңынан никахлашҡан кешеләргә һөртә торған һыу. *Никах уҡылып доға ҡылынгас, Үмәр карт ашаулыҡ өҫтөндәге бер сәйнүк һыуҙы алып, шаршау артынан бисәһе яғына бирҙе. Дин китаптары буйынса был никах һыуы бөтә ауырыуҙарҙан дауа ине.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Өйләнешкәнлекте рәсми рәүештә законлаштырыу тәртибе. *Никах ҡатын менән ирҙең ирекле ризалыгына нигеҙләнә.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. **Никах ҡағыҙы** икәү-ара

өйләнешкәндә таныткан ҡағыҙ. **Никахҡа инеү** *ҡар.* **никахлашыу. Никах яңыртыу** ҡабатлап өйләнеү йәки иргә барыу.

**НИКАХЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **никахлау.** *[Шәүрә — Аҡмырҙаға:] Артыҡ ашығырға сәбәп юҡ бит: мин ҡыҙ түгел, никахланған ҡатын, беҙгә күрешергә ярамай.* Б. Бикбай.

**2.** Өйләнеү. *Үҙеңдән оло кешегә никахланыу.*

**НИКАХЛАУ** *ҡ.* **1.** Өйләндереү. *Байыраҡ кешеләр 15 йәшкә еткәс тә, балаларҙы .. никахлау өсөн ясыу йөрөтә башлай.* М. Буранғолов.

**2.** Никах йолаһын башҡарғанда махсус доға уҡып, никахты шәриғәт буйынса раҫлау. *Батша егеткә былай тигән: — Бар, хәҙер өйөңә ҡайт. Иртәгә һиңә өлкән ҡыҙымды никахлап бирермен* (Әкиәттән).

**НИКАХЛАШЫУ** *ҡ.* Өйләнешеү. *[Ярлы ғаиләһендә] буласаҡ ир менән ҡатындың никахлашыуы ла күп осраҡта үҙ-ара мөхәббәткә ҡоролған булған.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1968, № 8.

**НИКАХЛЫ** *с.* **1.** Никах (1 *мәғ.*) уҡытып кейәүгә бирелгән йәки өйләндерелгән. *[Ныязгол Айбулатҡа:] Әллә һин кешенең никахлы кәләшен урлағас та .. һиңә сәпсим закон юҡ тип, иркенләп киттеңме?* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Никахтан (2 *мәғ.*) үткән, законлаштырылған. *Никахлы ир. Никахлы ҡатын.* ■ *Никахлы тормошта .. иң мөһиме — мөхәббәт, Ир менән ҡатын араһында булған рухи яҡынлыҡ.* В. Ғүмәров.

**НИКАХҺЫҘ** *с.* **1.** Никах (1 *мәғ.*) уҡылмаған, никах менән нығытылмаған. *Никахһыҙ ҡатын. // Никахһыҙ йәшәү.*

**2.** Никахтан (2 *мәғ.*) үтмәгән, законлаштырылмаған. *Никахһыҙ тормош.*

**НИКЕЛИН** [*рус.*] *и.* **1.** Никель рудаһының береһе, ҡыҙыл никель колчеданы.

**2.** Баҡыр менән никель иретмәһе.

**НИКЕЛЛЕ** *с.* **1.** Составында никель булған. *Никелле руда.* 2. Никель ялатылған, никелләнгән. *Никелле карауат.*

**НИКЕЛЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **никелләү.** *Никелләнгән карауат.*

**НИКЕЛЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **никелләү.**

**НИКЕЛЛӘҮ** *ҡ.* Никель ялатыу. *Һауыт-һабаны никелләү.*

**НИКЕЛЬ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Химик элемент, ялтырауыҡлы аҡ төҫтәге эҫегә сыҙамлы металл.

**НИКОТИН** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Тәмәкеләге наркотик матдә. *Тәмәкеләге никотин иң зарарлы ағыу иҫәпләнә.* З. Заһиҙуллин.

**НИКРУТ** *и. ҡар.* **некрут.**

**НИКӘҮ** *ҡ. һөйл.* Ҡабат-ҡабат ныҡып әйтеү. *[Шакир:] Мин һеҙгә нисәмә ҡабат әйттем инде, бер нәмәне күп никәмәгеҙ, тип. Колхоз да колхоз тиһегеҙ, барығыҙ ҙа инегеҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**НИКӘШЕҮ** *ҡ. диал.* Ныҡышыу.

**НИҠАП** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Йөҙҙө ҡаплай торған пәрҙә; пәрәнжә, битлек. *Ни яҙайым, бер генә рәхмәт никабың асмағас.* Ш. Бабич.

**НИЛЕКТӘН** *һор. а. һөйл.* Ниндәй сәбәп менән; ни өсөн. *Курше-күләндәре уларға һирәк инә. Нилектән икәнен әйтеүе ҡыйын.* «Йәш көстәр», 1957.

**НИМЕС** [*рус.* немец] *и. һөйл. ҡар.* **немец.**

**НИМФА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Боронғо грек мифологияһында: тәбиғәт көстәрен сағылдырған, ҡатын-ҡыҙ һынындағы алла.

**НИМӘ** *һор. а.* **1.** Эш-хәл йәки берәй нәмә тураһындағы һорауҙы белдерә; ни? *Зәйнәп һорай: — Сәйҙел, нимә булды? Һалҡынайҙың, Сәйҙел, һин миңә?* Ғ. Сәләм. *Таҙ быларҙан: «Нимә булешәһегеҙ?» — тип һораны, ти* (Әкиәттән). / *Һорау һөйләмдең башында һорауҙы көсәйтеү өсөн ҡулланыла. [Талипов:] Нимә, иптәш секретарь, әллә бында ла мәғәрис-фәлән менән тамаҡ йылыталармы?* М. Тажи. **Нимә бар** өндәшкән кешегә тауыш биргәндә әйтелә; ни бар.

**2.** Һөйләмдә атап күрһәтелмәгән билдәһеҙ эш-хәл йәки нәмәне белдереү өсөн ҡулланыла; ни. *[Егет] хандың нимә бойорғанын ҡатынына һөйләп биргән* (Әкиәттән). **Теләһә нимә** юҡ-бар нәмә; теләһә ни.

**3.** Эш-хәл йәки нәмәгә ҡарата ниндәйҙер мөнәсәбәтте белдергән риторик һорауҙы аңлата; ни! *Үҙе нимә лә эше нимә! Еңде тигән исеме нимә!* ■ *Бер иртәһе генә нимә тора май айында Ҡырым көнөнөң.* Ғ. Сәләм. **Нимә ҡалған** кешенең берәй эшкә ҡыҫылыуын хуп күрмәгәндә әйтелә; ни ҡалған. **Нимә ул** берәй нәмәне ҙурға һанамағанды белдереү өсөн әйтелә. *Беҙгә һыуыҡ нимә ул!*

**4.** Ниҙәлер кире ҡаҡҡан йәки уға шик белдергән риторик һорауҙы аңлата; ни!, ниндәй! *[Фәхри:] Ҡуйсәле, шуның тартылдауының нимә ҡыҙығы бар!* Б. Бикбай.

**5.** Ни сәбәп менән, ни өсөн, ниңә. *[Маянһылыу:] Нимә юкты һамаҡлап, ҡанға тоҙ һалып йөрөйһөң, бысаҡ ҡаҙалғыр.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**НИМӘКӘЙ** *һор. а. һөйл. ҡар.* **нимә** 1, 2.— *Туҡта әле, мин әйтәм, асып ҡарайым, эсендә нимәкәй бар икән* (Әкиәттән).

**НИМӘЛЕР** *билдһ. а. ҡар.* **ниҙер.** *Тайфуров та милиционерҙың ҡолағына нимәлер шыбырланы.* М. Тажи. *Егеттең йөрәген нимәлер өтөп алды.* И. Ғиззәтуллин.

**НИМӘРӘ** [*фарс.*] *и.* **1.** Ейән йәки ейәнсәрҙең балалары; бүлә, бүләсәр.

**2.** Дүртенсе быуын балалар (бер-береһенә ҡарата).

● *Нимәрә нимәһен бирә? Итен ашап, һөйәген бирә.* Мәҡәл.

**НИМӘҺЕ** *р.* Ниндәй сәбәп менән, ни өсөн, ниңә (эш-хәлгә кире мөнәсәбәт белдергәндә әйтелә). *[Ҡаҙанҡап:] Йә, етте һиңә. Нимәһе өҙмәйһең дә ҡуймайһың.* Һ. Дәүләтшина.

**НИМӘҺЕНӘ** *р. ҡар.* **нимәһе.** *[Бай:] Нимәһенә ғауға ҡутәрәһегеҙ? Бер тәңкәлек алтынға йөҙ тәңкәлек тауыш.* Я. Хамматов.

**НИНДӘЙ** *һор. а.* **1.** Берәй кешенең, нәмәнең сифаты йәки эш-хәлдең рәүеше тураһындағы һорауҙы белдерә. *[Ҡыҙым һорай:] Ниндәй ул Мәскәү, матурмы?* Р. Ниғмәти. *Ниндәй кис был?! Елһеҙ, үҙе йылы.* К. Кинйәбулатова. *«Ул төлкөләр ниндәй ине һуң?» — тип һорашҡан була төлкө* (Әкиәттән).

**2.** Һөйләмдә эш-хәл йәки нәмәнең атап күрһәтелмәгән рәүешен сифатын белдерә. *Ерҙә ниндәй генә гөл үҫмәһен, тиң була алмаҫ беҙҙең гөл-*

дәргә. М. Хәй. *Гөлнур .. Сәгиҙәнең ниндәй мәҙәк табып көлөүенең сәбәбен белергә теләне.* М. Тажи.

**3.** Нимәнелер кире ҡаҡҡан риторик һораҙы аңлата. *Ниндәй туған ти ул! Ниндәй шау-шыу таптың?! Бысракта ниндәй юлға сығыу ти ул!*

**4.** Өндәш һөйләмдәрҙә эш-хәлдең рәүешенә йәки берәй нәмәнең сифатына ҡарата һоҡланыу, аптырау йә башҡа төрлө мөнәсәбәт белдергәндә ҡулланыла. *Россиян мин — ниндәй ғорурлыҡ!* М. Кәрим. *Ниндәй матур был төн, ниндәй яҡын минең күңелгә.* Х. Ҡунаҡбай. *Ниндәй хурлыҡ, туғандар, эй дуҫ-иштәр, купискә тилмереп барып тороуҙар!* (Бәйеттән).

◆ **Бер ниндәй** ҙә бер төрлө лә, һис бер. *Өс көн үткән, биш көн үткән, ете көн үткән, бай һаман бер ниндәй ҙә эш ҡушмай ти, Оморҙаҡҡа* (Әкиәттән). **Ниндәй ҙә булһа** берәй төрлө. *Сәгиҙә унан ниндәй ҙә булһа теләктәшлек көтә ине.* М. Тажи. **Теләһә ниндәй** 1) түбән баһалы юҡ-бар. *Теләһә ниндәй нәмә;* 2) таныш булмаған, билдәһеҙ. *Теләһә ниндәй кеше.* **Әллә ниндәй** ниндәйҙер бер; билдәһеҙ. *Иртәгә кис оҙаталар әллә ниндәй калаға* (Бәйеттән).

● *Дуҫың ниндәй ҡәҙерең шундай.* Мәҡәл.

**НИНДӘЙЕН** *һор. а.* Өндәш һөйләмдәрҙә эш-хәлдең рәүешенә йәки берәй нәмәнең сифатына ҡарата һоҡланыу, аптырау кеүек мөнәсәбәт белдергәндә ҡулланыла; ниндәй; *[Ғариф:] Ҡара, ниндәйен кәттә ыңғырсаҡ булды.* Б. Бикбай.

**НИНДӘЙҘЕР** *билдһ. а.* Кем йәки нимә икәне билдәһеҙ; әллә ниндәй. *Ниндәйҙер тауыш ишетелде.*

**НИҢӘ** *һор. а.* Ниндәй маҡсат йәки сәбәп менән; ни өсөн? *Ниңә урман былай йәшел икән, һыуҙар бигерәк таҙа икән, тим.* М. Хәй. *Ниңә килмәй икән уның хаты, әллә юкмы икән форсаты?* (Халыҡ йырынан). **Әллә ниңә** *ҡар.* **ниңәлер.** *Әллә ниңә һаман эсем боша, әллә ниңә күңел һыҙлана.* Н. Иҙелбай.

**НИҢӘЛЕР** *билдһ. а.* Ни өсөндөр, ни сәбәптәндер. *Быны тыңлап, ниңәлер хан ҡыуанманы, Бабсаҡ әйткән һүҙҙәргә йыуанманы.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**НИРГӘ** [*фарс.*] *и.* Бура, өй кеүек ҡоролмала уратып һалынған бер ҡат бүрәнә. *Ниргә бүйы.* ■ *[Мөхәммәт:] Нигеҙе серегән, аҫҡы ниргәләрен алмаштырабыҙ.* Я. Вәлиев. *Рәүф .. мәсет янына барып еткәндә, уның тәүге ниргәләрен тейәгән ылауҙар ҡуҙғалып китергә генә тора ине.* Р. Ғабдрахманов.

**НИСА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ҡатын-ҡыҙ.

**2.** *(баш хәреф менән)* Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**НИСАН** [*фарс.*] *и. иҫк.* Апрель. *Нисан айы.* **Нисан ямғыры** иң тәүге яҙғы ямғыр; ләйсән.

**НИСБИ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Сағыштырма. *Нәмәнең нисби киммәте.*

**НИСБӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Нәмәләрҙең үҙ-ара сағыштырма күләме йәки дәүмәле, һаны, иҫәбе. *Ҡапма-ҡаршы көстәрҙең нисбәте аҙ тигәндә бергә биш ине; йәғни беҙҙең бер һалдатҡа немецтарҙың биш һалдаты тура килде.* Ғ. Әмири.

**2.** Төрлө нәмә, күренеш, эш-хәлдең бер-береһенә мөнәсәбәттәш бәйләнеше. *Әҫәрҙең күләме менән уның образлы йөкмәткеһе араһындағы нисбәтте үҙ эсенә алырлыҡ яңы әҙәби төшөнсә кәрәк.* К. Әхмәтйәнов. *[Әсәйем] үҙенең йөҙ йыл ғүмерен бөткөһөҙ ваҡ-төйәктәре менән йылдар нисбәтенә тура килтереп иҫләй.* М. Кәрим.

**НИСБӘТЛЕК: нисбәтлек теорияһы** *физ.* хәрәкәт итеүсе материяны пространство һәм ваҡыт яғынан тикшерә торған теория; сағыштырмалылыҡ теорияһы.

**НИСБӘТӘН** [*ғәр.*] *р.* Кем йәки нимәгәләр бәйләнешле рәүештә, сағыштырғанда. *Беҙҙең хужалыҡ үҫә, нығый бара. Быға нисбәтән эшселәр ялпыһының мәҙәни теләктәре лә арта килә.* Т. Йәнәби.

**НИСЕК** *һор. а.* **1.** Эш-хәрәкәт йәки хәлдең башҡарылыш, булмыш рәүешен һораҙы белдерә; ни рәүешле? *Хәлең нисек? Эш нисек? Нисек итеп ҡайтырға?* ■ *— Минең бит итәк тулы бала. Мин уларҙы нисек аҫырайым?* З. Биишева. *Зәйнәп менән айырылыштығыҙмы? Ҡайҙа эшләй, нисек йәшәй ул?* Ғ. Сәләм.

**2.** Эш-хәрәкәт йәки хәлдең башҡарылыш, булмыш рәүешенә ҡарата төрлө хис һәм мөнәсәбәт белдергән риторик һораҙы аңлата; ни рәүешле. *Мәҡәләһе яңылыш сыҡһа нисек түҙер, яҙыусы бит — уның күңеле сүйын түгел.* Ш. Бабич.

**3.** Эш-хәрәкәт йәки хәлдең билдәләнмәгән рәүешен белдерә; ни рәүешле. *Йырла шул ҡырҙарҙа батырҙарҙың нисек итеп колхоз ҡорғанын!* Ғ. Амантай. **Әллә нисек** эш-хәлдең булыу рәтен асыҡ ҡына билдәләп булмағанда әйтелә. *Көн әллә нисек үтте. Әллә нисек дуҫлашып та алғандар.* ■ *[Сәгиҙә:] ташлап китеүе әллә нисек булып тора, йәл кеүек.* М. Тажи.

**4.** Эш-хәрәкәт йәки хәлдең мөмкинлеге хаҡындағы һораҙы белдерә; ни хәл итеп. *— Нисек ҡурҡмай бында ҡалдың?* Д. Юлтый. *Нисек кенә ҡыйып әйтергә һуң.., һүҙҙәрем-телем осонда.* Ф. Туғыҙбаева.

**5.** Эш-хәлдең булмышы тураһындағы дөйөм инеш һораҙы аңлата.— *Нисек, урын табып буламы әле?* С. Агиш.

◆ **Бер нисек тә** һис кенә лә. *[Үмәр:] йыназаһыҙ күмелгән әҙәмдең гөнаһы теге донъяла бер нисек тә киселмәй тигән бит китапта.* Һ. Дәүләтшина. **Нисек булһа ла** *йәки* **нисек тә** ниндәй ҙә булһа бер әмәл менән. *Күңелең берәй ҡыҙға төшһә, нисек булһа ла әүрәтергә тырышаһың.* Т. Йәнәби. **Нисек итәһең** сараһыҙлыҡты, көсһөҙлөктө аңлатыу өсөн ҡулланыла. *Нисек итәһең, бармай сара юҡ.* **Теләһә нисек** тәртипһеҙ рәүештә. *Теләһә нисек ташлау.* **Һис нисек** бер төрлө лә, һис тә. *— Әршит иптәш, быныһына инде мин һис нисек ҡушыла алмайым.* Ғ. Сәләм.

**НИСЕКТЕР** *билдһ. а.* **1.** Эш-хәрәкәттең башҡарылыу рәүешен дөрөҫ кенә итеп билдәләп булмағанда әйтелә; ниндәйҙер юл йәки сара менән. *Юлда барған саҡта ҡыҙ нисектер ҡасҡан.* Б. Бикбай.

**2.** Эш-хәл йәки нәмәнең берәй рәүеше, сифаты ныҡ билдәле булмаған саҡта әйтелә; ни рәүешлелер. *Ҡала беҙҙе нисектер һәйбәт ҡаршы алған кеүек булды.* С. Агиш.

**НИСЫФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ярты.

◆ **Нисфы ләйел** төн уртаһы. **Нисфы наһар** көн уртаһы, төш ваҡыты.

**НИСӘ** *һор. а.* **1.** Күләм, дәүмәл, һан тураһындағы һорауҙы белдерә; күпме? *Нисә йәш? Нисә көн? Нисә кеше? Нисә аҙым? Нисә тапҡыр? Сәғәт нисә?* ■ *Иҫәр ел, һин ҡайҙан иҫтең, нисә ҡала үтә кистең?* (Бәйеттән).

**2.** Атап күрһәтелмәгән, билдәләнмәгән һанды белдереү өсөн ҡулланыла. *Нисә айҙыр инде, хат юҡ.* ■ *Крәҫтиән балаларының баҫылыуына нисә генә йыл үтте.* Һ. Дәүләтшина. **Бер нисә** иҫәбе билдәләнмәгән һанды белдерә; байтаҡ. *Бер нисә аҙна үткәс, Аҡназар аҙ-маҙлап ауыҙына аш ала башлай* (Әкиәттән). *[Наилә:] Бер нисә тапҡыр осрашырға тип вәғәҙәләштек тә нисектер тура килмәне.* Н. Иҙелбай. **Әллә нисә** һаны билдәһеҙ; күп кенә. *Әлеүкәйҙең атаһы өйөнә ҡайтып, әллә нисә һарыҡ һуйып, бөтә ауылды ҡунаҡҡа саҡырған* (Әкиәттән).

**3.** Һан яғынан күп булғанды белдерә; нисәмә. *Һин тыуғас, инде нисә ҡат торналар ҡайтып китте! Бәпестәргә улар күпме тәпәйҙәр бүләк итте.* Р. Ғабдрахманов. *Ҡара төтөн араһында нисә көндәр һуғыштыҡ* (Бәйеттән). / Кире эйәрсен һөйләмдә, эш-хәрәкәттең күп тапҡыр ҡабатланғанын белдерә; күпме. *[Әхсән — Ғиззәткә:] Нисә ҡарама, һинең прилавка алдында .. һүҙ буткаһы бешереп торалар.* Х. Ибраһимов.

♦ **Нисә әйтһәң дә** *шул уҡ* **ни тиһәң дә** (*ҡар.* **ни** [1]).

● *Нисә сәйнәһәң дә бер балыҡ башы.* Мәҡәл.

**НИСӘЛЕ** *һор. а.* Берәй нәмәнең үлсәме тураһындағы һорауҙы белдерә. *Был шәм нисәле? Нисәле калуш кейәһең?*

**НИСӘМӘ** *һор. а.* **1.** Билдәләнмәгән һанды белдереү өсөн ҡулланыла. *Өс сәғәт дауам иткән был тамашала бер нисәмә йөҙ кеше үҙенең һөнәрен, дәртен, ижади мөкинлектәрен күрһәтте.* Р. Шәкүров.

**2.** Һан яғынан бик күп булғанды билдәләп шуға баҫым яһау өсөн ҡулланыла. *Нисәмә йылдар буйына бер ҙур ҡунаҡ төҫөн күрмәй торсәле!* Ғ. Дәүләтшин.

**НИСӘНСЕ** *һор. а.* Берәй нәмәнең иҫәп йәки тәртип буйынса тотҡан урыны хаҡындағы һорауҙы белдерә. *Нисәнсе йорт? Быйыл һин нисәнсе класта уҡыйһың?*

**НИСӘНСЕЛЕР** *билдһ. а.* Иҫәп йәки тәртип буйынса булған урындың билдәһеҙлеген белдерә. *Ул [Абдулла] тиҫбеһенең нисәнселер мунсағын тартҡанда яңылышып китте.* Һ. Дәүләтшина.

**НИСӘҮ** *һор. а.* Кем йәки нәмәнең һанын исемләштереп һорауҙы белдерә. *Һеҙ нисәү килдегеҙ?* ■ *Күрәгәһе йәмле, ҡымыҙы тәмле, нисәү икән һауған бейәһе?* (Халыҡ йырынан).

**НИТЕҮ** *к.* Һөйләгәндә ҡапыл ғына әйтә алмаған һүҙ урынында ҡулланыла. *[Ғәлим — Рәүфкә:] Фәниәң нитә бит — башыңдан көлә.* Ф. Иҫәнғолов.

**НИТКӘН** *с. ҡыҫҡ. ф. һөйл.* Ни иткән; ни тигән, ниндәй.— *Бисәң дә шул орсоҡтай балаға ҡаныҡҡан. Ниткән туҡмау ул гел генә? — тине өләсәй.* Ғ. Ғүмәр.

**НИТРА́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Азот кислотаһының тоҙо.

**НИТРОБЕНЗО́Л** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Азот һәм күкерт кислотаһының бензолға тәьҫире һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән үткер еҫле, ағыулы ҡуйы һарғылт шыйыҡса (анилин һәм башҡа органик берләшмәләр алыу өсөн ҡулланыла).

**НИТРОГЛИЦЕРИ́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Глицеринға азот һәм күкерт кислоталары ҡушып яһалған май һымаҡ шыйыҡса (шартлауыҡлы матдә сифатында ла, дарыу сифатында ла ҡулланыла).

**НИТӘК(КИ)** [*фарс.*] *р. иҫк. кит.* Нисек, ни рәүешле. *Нитәкки әҙәм ғәлиәссәләм иблис мәлғүндең ялған һүҙе менән дәрәжәһенән төштө?* М. Өмөтбаев.

**НИФАҠ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ике йөҙләлөк, ялғанлыҡ. *Тыныр бошоноу, асыу, ярһыу ҡара, йәмһеҙ бәхеттәргә, рыя, ялған, нифаҡ тулған, тығыҙ, тар ер — ләхеттәрҙә.* Б. Мирзанов.

**НИХӘЛ** *өндш.* Иҫәнләшкәндә әйтелә. *Ҡайтып еткәс өйгә: «Нихәл, әсәй, һаумы?» — тиермен.* Ғ. Амантай.

**НИҺАЙӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ниҙеңдер аҙағы, сиге. *Был уҫаллыҡтарҙың ахыр бер ниһайәһе барҙыр.* «Батыршаның хаты».

**НИҺАЙӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк.* Берәй нәмәнең аҙағы, сиге.

**2.** *инш.* Ахыр килеп, ахырҙа. *Ниһайәт, миһырбанлы бер шофер автобусын туҡтатты.* А. Ғирфанов. *Ниһайәт, күк көмбәҙенә беҙ көткән ҡыҙыл шарҙар эленде. Атакаға киттек.* Ғ. Аллаяров.

♦ **Ниһайәт биреү** сик ҡуйыу. *Тәртипһеҙлеккә ниһайәт биреү.* **Ниһайәт дәрәжәлә** сиктән тыш.

**НИҺАЙӘТҺЕҘ** *с. иҫк. кит.* Сикһеҙ, ахырһыҙ. *Ниһайәтһеҙ йыһан.* // *Йөҙәр һумын ярым айҙа уҡ йоторҙар, ниһайәтһеҙ уны исраф ҡылырҙар* (Бәйеттән).

**НИҺАЙӘҺЕҘ** *с. иҫк. кит.* Сиге булмаған, сикһеҙ. *Борон заман башҡорттарҙың торған ере булған тиҙәр миҫле донъя йыһанылай. Ниһайәһеҙ сәхрәләрҙә, урмандарҙа тирмә менән күсеп йөрөгән замандары.* Д. Юлтый.

**НИШАН** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Билдә, тамға, билге. *Таш һәйкәл һалынып, кәберендә нишан улыр.* С. Яҡшығолов.

**2.** Сәп, мишень.

**3.** Егет менән ҡыҙҙың үҙ-ара вәғәҙә билдәһе итеп бирешкән бүләктәре (мәҫ. йөҙөк).

**4.** Ниндәйҙер эш, ҡаҙаныш өсөн бирелгән айырмалыҡ билдәһе; орден. *Ни сәбәптән бирелгән һеҙгә был төрлө нишан? Юҡҡа бирмәҫтәр ине. Һеҙ, шөбһәһеҙ, хөрмәтле йән.* М. Ғафури.

**НИШАНА** [*ғәр.*] *с.* Килбәте, ҡиәфәте бик ҡурҡыныс, ерәнес. *[Аҡназарға] бер нәмә тап булған. Балыҡ тиһәң — балыҡ түгел, йылан тиһәң — йылан түгел. Күҙе еҙ тас дәүмәлле, аяҡтары ла бар. Аҡназар атам тип әҙерләнгәс, теге нишана телгә килеп: «Атма, атма, харап булырһың»,— тигән* (Әкиәттән). / Әрләгәндә әйтелә. *[Фатима:] Ана Солтанға ҡарағыҙ: һөлөк кеүек егет. Шуны оҡшатмаған була [Гөлбикә], нишана.* Р. Ниғмәти.

**НИШАНСЫ** *и. иҫк.* Төҙ атыусы; мәргән.

**НИША́ТЫР** [*рус.* нашатырь ⟨ *ғәр.*] *и.* Хлорлы аммоний, аҡ төҫтәге кристаллик матдә (техникала ҡулланыла).

◆ **Нишатыр спирты** аммиактың һыуҙағы иретмәһе (техника һәм медицинала ҡулланыла). *Тын алам тиһәм, танауға нишатыр спирты еҫе килеп тулды.* Ә. Бикчәнтәев.

**НИШЛӘЙҺЕҢ** *инш.* Сараһыҙлыҡты белдереү өсөн ҡулланыла. *Нишләйһең, күнергә тура килә.* ■ *[Айбулат:] Русса түгел, башҡортса уҡыусы ла һирәк тә бит, нишләйһең.* Һ. Дәүләтшина.

**НИШЛӘП** *һор. а.* Ниндәй сәбәп менән; ни өсөн, ниңә. *[Мәүлет:] Нишләп был кәҙәр һуңлап йөрөйһөң? Ҡана тиҙерәк эште бөтөрөп алайыҡ.* Ғ. Дәүләтшин. *«Эй, бабай,— тигән был тау хужаһы,— нишләп бик бойоғоп киттең?* (Әкиәттән). **Әллә нишләп** ни өсөндөр, ниңәлер. *Күктә йондоҙҙар һаны күбәйҙе.. Уларға ҡарайым. Ауылда сакта беҙ уларҙы бүлешә торғайныҡ, әллә нишләп шулар иҫкә төшөп алды.* С. Агиш.

**НИШЛӘПТЕР** *билдһ. а.* Сәбәбе билдәһеҙ булғанды аңлата; ни өсөндөр, ниңәлер. *[Шәмсиә:] Ул ике тапҡыр волость өйөнә барҙы. Нишләптер һине осрата алмаған.* Һ. Дәүләтшина.

**НИШЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **нишләү**. *Һинең уттарыңда янам, теләһә нишләт инде* (Халыҡ йырынан).

**НИШЛӘҮ** *к.* **1.** Билдәһеҙ йәки билдәләнмәгән эш-хәрәкәтте аңлата. *Нурулла .. хеҙмәне үҙенең нишләгәнен.* С. Ҡудаш. *Нишләргә белмәй уйлапып үлтыра-үлтыра ла [ире] ҡатынын эҙләргә сығып китмәксе була* (Әкиәттән). **Теләһә нишләһен** ни ҡылһа ла үҙ иркендә тигән мәғәнәлә ҡулланыла. *Килһә — килер, килмәһә — теләһә нишләһен, тигән фекергә килдем дә [ҡыҙҙы] саҡырып хат яҙҙым.* Т. Йәнәби. **Нишләмәк кәрәк** *инш.* сараһыҙлыҡты белдерер өсөн әйтелә; нишләйһең. *[Тимер:] Нишләмәк кәрәк, ҡаршы килергә хаҡым юҡ.* Б. Бикбай.

**2.** *һор. а. мәғ.* Эш-хәлде асыҡларға теләп һорағанды аңлата. *Беҙ Зөләйха менән икәүләп торҙоҡ та ҡалдыҡ. Инде нишләргә?* Т. Йәнәби. *[Көтөүсе:] Аҡса менән нишләрмән икән һуң?* (Әкиәттән).

**НИӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Берәй нәмә эшләүгә, башҡарыуға булған иҫәп, алға ҡуйған теләк. *Ҙур ниәт. Изге ниәт. Насар ниәт. Уҫал ниәт. Яҡшы ниәт. Кешенең ниәтен боҙоу.* ■ *Юлға йыйыныуым да ағайымды китеүҙән туҡтатыу ниәте менән генә эшләнгән эш ине.* Ә. Бикчәнтәев. *[Ғаяз:] Әллә ағайыңдан уҙҙырырға ла ниәт бармы?* Ф. Әсәнов. *Һәүбәндең бер ҙә һыу батшалығында ҡалыу ниәте булмаған.* «Аҡбуҙат».

**2.** Алдан әйтеп ҡуйылған саҙаҡа. *[Ҡатын:] Раббым, үлтермәй генә ҡуйһалар, Мәлихә әбейгә егерме тин ниәт бирер инем!* З. Бәшири.

□ **Ниәт итеү** (*йәки* **тотоу**) берәй нәмә эшләргә уйлау, ниәтләнеү.

● *Изге ниәт — ярты дәүләт.* Мәҡәл.

**НИӘТЛӘНЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **ниәтләү** [1]. *Ниәтләнгән эш.*

**2.** Берәй нәмә эшләргә уйлау; ниәт итеү. *[Аҡназар] ил яңылыҡтарын үҙ ҡолаҡтары менән тыңларға ниәтләнеп, һалдатты күрергә китте.* Я. Хамматов.

**НИӘТЛӘҮ** *к.* **1.** Берәй нәмә эшләргә уйлау; ниәт итеү, ниәтләнеү. *Өй һалырға ниәтләү.* ■ *Ҙур эшкә ниәтләп торабыҙ; ураҡ эшен дәррәү, бик тиҙ генә хәл итергә план ҡорабыҙ.* Ғ. Әмири.

**2.** Ниндәйҙер шарт менән берәй нәмә эшләргә алдан һүҙ ҡуйыу, алдан бағышлау. *Хәйер ниәтләү.* ■ *[Мәғфүрә:] Үткән разведкаларын быраулағанда нәфел намаҙҙарын ниәтләп теләһәм дә хоҙай ярлыҡаманы.* И. Абдуллин.

◆ **Намаҙ ниәтләү** намаҙҙың инеш һүҙен әйтеү. *Бығаса бер кем дә хатты башҡортса яҙмаған. Намаҙ ниәтләгәндә әйтелә торған төрөксә яҙа торған булған.* С. Агиш.

**НИЯЗ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Үтенес. *Ҡәнәғәт ҡыламын мин күреп төҫөн, уның наҙына бар яңғыҙ ниязым.* М. Ғафури.

**2.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

□ **Нияз итеү** (*йәки* **ҡылыу**) үтенеү.

**НОВА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Берәй эш өлкәһендә яңы идея, принцип, яңы эш алымдары уйлап сығарыусы һәм уларҙы тормошҡа ашырыусы кеше. *Производство новаторҙары. Сәнғәт новаторҙары.*

**НОВАТОРЛЫҠ** *и.* Эшкә яңылыҡ индереү эше, новаторҙар эше. *Бөгөн ауыл хужалығына .. актив, юғары профессиональ оҫталыҡ менән эшләрлек, новаторлыҡ һәләте булған кешеләр кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.

**НОВЕ́ЛЛА** [1] [*рус.* ⟨ *ит.*] *и. әҙ.* Бәләкәй хикәйә. *С. Агиш новеллалары.* ■ *Новеллала, ғәҙәттә, хикәйәгә ҡарағанда тарыраҡ тема алына.* К. Әхмәтйәнов.

**НОВЕ́ЛЛА** [2] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. юр.* Закондар йыйынтығына индерелгән иң һуңғы өҫтәмә.

**НОВЕЛЛАСЫ** *и.* Новелла [1] яҙыусы.

**НОВЕЛЛИ́СТ** [*рус.*] *и. кар.* **новелласы.**

**НОВОКАЙН** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ауыртыуҙы баҫыу, шул уҡ ваҡытта дауалау өсөн дә ҡулланыла торған химик препарат.

**НОҒАЛА** *и.* Малдың күҙенә үрә торған шекәрә; мал күҙенә төшкән аҡ.

**НОҠ** [1] *и.* Ҡорт йырып төшөргән ағас вағы.

**НОҠ** [2] *и. [Нух пәйғәмбәрҙең исеменән]:* **ноҡ заманы** бик боронғо, әллә ҡасанғы ваҡыт.

**НОҠОТ** [1] [*фарс.*] *и.* **1.** (*йәки* **ноҡот борсағы**) Оҙонса ҡыяҡ япраҡлы, аҡ, сыбар сәскәле, оҙонсараҡ эре орлоҡло бейек һабаҡлы баҡса үҫемлеге; ҡара борсаҡ.

**2.** Ал сәскәле селектең емеше (өрөк һөйәгенә оҡшаған, тышы йөнтәҫ).

◆ **Ноҡот һалыу** (*йәки* **бүлеү**) ҡырҡ бер бөртөк ноҡот борсағын йәки шуның кеүек башҡа нәмәне төрлөсә бүлгеләп күрәҙәлек ҡылыу. *Күрәҙә .. кеҫәһенән сығарған аҡ ҡына таштарҙы түгеп, «ҡырҡ бер» — тип һананы ла ноҡот бүлергә тотондо.* Я. Хамматов. *Тимерхандың ҡатыны сихырсыларҙан ноҡот һалдыра. Сихырсылар ҡыҙҙы тере тиҙәр* (Әкиәттән).

**НОҠОТ** [2] *с.* Аҡыл һәләтлеге түбән. *Ағай һин ҡыҙыҡ инде. Нишләп инде, колхоз бүлгәс ялсы булһын? Үҙең ҡайһы ваҡыт төптө бер ноҡот кеше һүҙен һөйләйһең дә ҡуяһың!* Һ. Дәүләтшина.

**НОҠОТЛАНЫУ** *к.* Аңраға, ноҡотҡа әйләнеү; ноҡот булыу.

**НОҠОТСО** *и.* Ноҡот бүлеп күрәҙәлек итеүсе; ноҡот һалыусы.

**НОҠСАН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Етешмәгән ер, кәмселек. *Маҡтансыҡ тип әйтә алмаҫ бер кем, дуҫтар түгел, хатта дошмандар. Тик нишләйһең, хатта ҡояшта ла әҙ-мәҙ генә быңдай ноҡсан бар.* С. Ҡудаш.

**НОҠТА** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **нөктә.**

♦ **Ноҡтаи назар** *иҫк.* ниндәйҙер күҙлектән сығып билдәләнгән ҡараш. *[Садри:] Хәреф хаталары тураһында әйтмәй булмай. Әкәмәт күп. Саманан тыш. Орфография ноҡтаи назарынан сығып ҡарағанда, был һис тә тәртәгә һыймай.* Ғ. Ибраһимов.

**НОКТЮРН** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ҙур булмаған лирик музыкаль әҫәр.

**НОЛЬ** *и.* [*рус.* ⟨ *лат.*] *ҡар.* **нуль.**

**НОМЕНКЛАТУ́РА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Фән, производство кеүек эш өлкәһенең берәй тармағында ҡулланылған атамалар йыйылмаһы. *Географик номенклатура. Медицина номенклатураһы.* / Төрлө нәмәләр атамаһының йыйылмаһы. *Эшләп сығарыла торған нәмәләр номенклатураһы.*

♦ **Номенклатуралы** (*йәки* **номенклатурағы) работник** юғары органдар тарафынан ҡуйыла йәки раҫлана торған работник. *Улар күптәнге таныштар. Галин номенклатуралы работник һәм эш буйынса Тимербулатов уға буйһона.* З. Хисмәтуллин.

**НО́МЕР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Бер иш нәмәләр теҙелешендәге предметтың рәт һаны. *Өй номеры. Телефон номеры. Инвентарь номеры.* ■ *[Хәйруллин:] Сәлих Мәхмүдович, бына был талондың корешогындағы номерҙы асыҡ ҡына белеп килегеҙ әле.* С. Агиш.

**2.** Тамға, билдә итеп цифр ҡуйылған нәмә (регистрация үткәнгә документ рәүешендә иҫәпләнелә). *Машина номеры. Табель номеры.*

**3.** Тейешле рәт һаны менән билдәләнгән айырым нәмә. *Журналдың һуңғы номеры.* ■ *Альков әллә ҡайҙан «Окопная Правда» газетаһының бер нисә яңы номерын алып килгән.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Гостиница, мунсалағы айырым бүлмә. *Гостиница номерында мине .. бер ағай ҡаршыланы.* Т. Сәғитов. / *күпл. иҫк.* Гостиница. *[Гәрәй] айҙар буйы Ырымбурҙа типтерҙе, тоҙ күленә барҙы. Ҡасим номерҙарынан сыҡмай эсеп ятты.* Б. Бикбай.

**5.** Концерт йәки башҡа тамашаның айырым башҡарыла торған бер өлөшө. *Акробатик номерҙар. Яңғыҙ номерҙар.* ■ *Номерҙарҙың күбеһе каланың үҙенән.. Ә ҡайҙа һуң ауыл таланттары?* Н. Иҙелбай.

**6.** *хәрб.* Орудие, пулемет һ. б. расчетындағы боец. *[Төхфәт Морат] орудие номеры, орудие командиры вазифаһында Төньяҡ Белоруссияны, Латвияны һәм Литваны азат итеүҙә ҡатнаша.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 ғинуар.

**НОМЕРЛАУ** *ҡ.* Номер (1 *мәғ.*) ҡуйыу, номер һуғыу. *Дәфтәрҙең биттәрен номерлап сығыу.*

**НОМЕРЛЫ** *с.* Номеры (1 *мәғ.*) булған, билдәле бер номерҙағы. *Унынсы номерлы йорт. Өсөнсө номерлы магазин.* ■ *Беренсе платформаға вагондарының ҡабырғаһына «Мәскәү — Батуми» тип яҙылған алтынсы номерлы поезд килеп туҡтаны.* И. Насыри.

**НОМИНА́Л** [*рус.* ⟨ *лат.*] *фин. и.* Баһалы ҡағыҙ, ҡағыҙ аҡса һәм тауарҙың өҫтөнә яҙып күрһәтелгән ҡиммәте, хаҡы. *Номинал буйынса һатыу.*

**НОМИНАЛЬ** *с. фин.* Аҡсалата күрһәтелгән, аҡса менән билгеләнгән. *Номиналь эш хаҡы.*

**НОМИНАТИВ** [*рус.* номинативный] *с. грам.* Атау, исемләү өсөн хеҙмәт иткән. *Һүҙҙең номинатив функцияһы.*

**НОР** *и.* Бал ҡорттарын сирләтә торған ваҡ ҡына ҡорт. *Нор төшөү.*

**НОРАУ** *ҡ. диал.* Хәлһеҙләнеү, арыу. *Әҫегә норау.*

**НОРВЕГ** *и.* **1.** Норвегияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (герман телдәренең береһендә һөйләшә). *Норвег халҡы. Норвег ҡатыны. Норвег теле.*

**НОРЛАУ** *ҡ.* Нор менән ауырыу (бал ҡорттарына ҡарата). *Бал ҡорто норлай буҙарып, сологонда бал бөтһә* (Халыҡ йырынан).

**НО́РМА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Билдәләнгән ҡанун. *Хоҡуҡ нормаһы.* / Дөйөм ҡабул ителеп, ҡанунлашып киткән тәртип. *Әҙәби тел нормаһы. Мораль нормалар.* / Өлгө, ҡағиҙә. *Ололарҙың ҡылыҡ-ғәҙәтен балалар норма итеп алыусан була.*

**2.** Берәй нәмәнең билдәләнгән үлсәме йәки күләме. *Аҙыҡ нормаһы. Эшләп сығарыу нормаһы.* ■ *Яҙғы сәсеү планы эшләмәйсә туламы? Тултырмаһаң норманы, уңыш алып буламы?* Ф. Дәүләтшин.

**НОРМАЛАУ** *ҡ.* Нимәнелер сикләп, норма ҡуйыу. *Аҙыҡты нормалап биреү.*

**НОРМАЛАШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **нормалаштырыу.**

**НОРМАЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Нормаға һалыу, норма билгеләү. *Эште нормалаштырыу.*

**НОРМАЛЛӘШЕҮ** *ҡ.* Нормаль хәлгә килеү. *Тормош нормалләшә башланы. Сик буйындағы хәл нормалләште.*

**НОРМАЛЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ.* Нормаль хәлгә килтереү. *Дәүләттәр араһындағы мөнәсәбәтте нормалләштереү.*

**НОРМАЛЬ** [*рус.* нормальный] *с.* **1.** Нормаға ярашлы, тейешле кимәлгә йәки сифатҡа, хәлгә ярашлы. *Нормаль атмосфера. Нормаль атмосфера баҫымы. Нормаль ауырлыҡ.* // *Нормаль эшләү.* ■ *Бөтә нәмәне башта тотоу, бер юлы иҫкә төшөрөү нормаль күренеш түгел. Был нервы күҙәнәктәренә ҙур көсөргәнеш бирә.* М. Ғатауллин.

**2.** Психик яҡтан һау, аҡылы теүәл. *Нормаль кеше.*

**НОРМАН** [*рус.* норманн] *и.* 8—11 быуаттарҙа Европа илдәренә өҙлөкһөҙ баҫҡын яһап, һөжүм итеп торған төньяҡ герман ҡәбиләләренең дөйөм исеме.

**НОРМАТИ́В** [1] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Эш өсөн билдәләнгән нормалар күрһәткесе. *Техник нормативтар. План нормативтары.*

**НОРМАТИВ** [2] [*рус.* нормативный] *с.* **1.** Тейешле үлсәм йәки күләм менән билдәләнгән. *Норматив эш күләме.*

**2.** Нимәнеңдер нормаһын билдәләй торған. *Норматив грамматика. Норматив иҫәп.*

**НОРМИРО́ВЩИК** [*рус.*] *и.* Норма билдәләү, нормаға һалыу эше менән шөғөлләнгән хеҙмәткәр.

**НОСИЛКА** [*рус.* носилки] *и.* Кешене йәки ауыр нәмәне күтәреп алып китеү өсөн хеҙмәт иткән ҡулайлама (ғәҙәттә таҡта йәки беше туҡыма менән тоташтырылған ике буй ағастан тора). *Носилкаға һалыу. Носилка менән алып барыу.*

**НОСИ́ЛЬЩИК** [*рус.*] *и.* Вокзал, пристань һ. б. урындарҙа кеше багажын ташыу менән шөғөлләнгән эшсе.

**НОСКИ́** [*рус.*] *и. кар.* **ойоҡбаш.**

**НОСОРО́Г** [*рус.*] *и.* Томшоҡ һәм маңлай һөйәгендә һыңар йәки ике мөгөҙө булған айыры тояҡлы эре һөтимәр хайуан (Африка менән көньяҡ-көнсығыш Азияла йәшәй); кәркәдән.

**НОСРАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ярҙам. *Күсәк бей.., ҡыҙ менән егетте күргәс, ебәрҙе, нәҫеленә зарар итмәйем, тип. Олатаһы Тура хан әйткәйне: «Алланан носрат булып, һин алһаң, нәҫелен өҙмә!» — тип. Олатаһы һүҙе менән ебәрҙе.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**2.** Еңеү, уңыш.

**3.** *(баш хәреф менән)* Ир-ат исеме.

**НО́ТА**[1] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ниндәй ҙә булһа музыкаль тауыштың шартлы график билдәһе. *«До» нотаһы. Нота грамотаһы.*

**2.** Музыка йәки йырҙағы тауыш. *Юғары нота. Түбән нота.*

**3.** Музыкаль әҫәрҙең шартлы график билдәләр менән яҙылған тексы һәм шул текст яҙылған дәфтәр йәки китап. *Нота дәфтәре. Нотаны уҡыу. Нотаға һалыу. Нота буйынса йырлау.* ■ *Гүйә домбра ҡылы — тимер юлы, пианино теле шпалдар. Ә сымдарға ҡунған ҡарлуғастар нота — көй яҙмаға оҡшайҙар.* С. Кулибай.

**НО́ТА**[2] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Бер дәүләт хөкүмәтенең икенсе дәүләт хөкүмәтенә яҙма рәүештә ебәргән рәсми дипломатик мөрәжәғәте. *Ризаһыҙлыҡ нотаһы. Нота бирешеү.*

**НОТАРИАЛЬ** [*рус.* нотариальный] *с.* Юридик акттарҙы, документ һәм күсермәләрҙе, ҡултамғаларҙы раҫлауға бәйле. *Нотариаль контора. Нотариаль күсермә.*

**НОТА́РИУС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Нотариаль акттар башҡарыу менән шөғөлләнгән вазифалы кеше. *Нотариус булып эшләү. Нотариустан раҫлатыу.*

**НОТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кар.* **нәсихәт.** *Нотация уҡыу.*

**НОТҠО** *и. кар.* **нотоҡ.**

**НОТОҠ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Халыҡ алдында һалған сығыш; телмәр. *Нотоҡ уҡыу. Нотоҡ тотоу. Нотоҡ һөйләү.*

**2.** Нәсихәт. *Нотоҡ уҡыуым түгел, оло булараҡ, кәңәш итеп әйтеүем генә: әҙер донъяға төшөм, тип, бәрәшәнләнеп мал туҙҙырма.* Т. Ғәрипова.

**НОЯ́БРЬ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Календарь йылының ун беренсе айы.

**НӨГӘР** [*монг.*] *и.* **1.** Батыр, хан эргәһендәге һаҡсы. *Буран бей тиңһеҙ .. алышта нөгәрҙәре менән бергә һәләк булған.* Ғ. Хөсәйенов. / *тар.* Хәрби һуғышсыларҙан торған төркөм. *Нөгәр туплау. Нөгәр йыйыу.* ■ *Яуға барған нөгәрҙең батырҙары күп булһын.* М. Буранғолов.

2. Кейәүҙе оҙата барған егет; кейәү егете.

**НӨҒӘТ** *с. диал.* Бөтмөр.

**НӨЖҮМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Йондоҙ.

◆ **Ғильме нөжүм** *йәки* **нөжүм ғилеме** астрономия.

**НӨЙӘТ** *и. диал. кар.* **мөйәт** 1.

**НӨКТӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Осло нәмә төртөлгәндән ҡалған эҙ, бәләкәй генә түңәрәк тап. *Нөктәләрҙән торған пунктир һыҙыҡ. Нөктә төртөү.* / *күсм.* Алыҫтан бәләкәй генә булып күренгән ҡара нәмә.

**2.** Бәләкәй генә түңәрәк төрткө рәүешендәге тыныш билдәһе. *Нөктә ҡуйыу.*

**3.** Алгебрала, нота яҙыуында, телеграф кодында, төрлө карталарҙа шартлы билге рәүешендәге тамға; төрткө. *Нөктә менән билдәләү.*

**4.** Үлсәме булмаған иң бәләкәй урын рәүешендә математика, физика һәм механикала ҡабул ителгән төп төшөнсә. *Киҫешеү нөктәһе. Тейеү нөктәһе.*

**5.** Берәй нәмә өҫтөндәге йәки пространстволағы бер урын. *Тауҙың иң бейек нөктәһе.* ■ *Күҙәреңде, Сәйҙел, ниңә бер нөктәгә төбәнең?* Ғ. Сәләм.

**6.** *физ.* Нәмәнең бер хәлдән икенсе хәлгә күсә торған температура сиге. *Иреү нөктәһе. Ҡайнау нөктәһе. Туңыу нөктәһе.*

**7.** Иң юғары кимәл, сик. *Кульминация нөктәһе.* ■ *Беҙҙең уйҙар, хыялдар күңел теләгән ирек нөктәһенә ҡарап саба.* Д. Юлтый.

◆ **Ике нөктә** аҫлы-өҫлө ике төрткө рәүешендәге тыныш билдәһе [:]. **Күп нөктә** өс төрткө рәүешендәге тыныш билдәһе [...]. **Ут нөктәһе** һуғыш ҡырында урынлаштырылған туп, пулемёт һ. б. **Нөктәле өтөр** аҫлы-өҫлө ҡуйылған нөктә менән өтөр рәүешендәге тыныш билдәһе [;].

**НӨСХӘ** [*ғәр.*] *и.* Дана, экземпляр. *Был баҫма .. яҙыусының [Ғ. Хәйриҙең] үҙ ҡулы менән күсереп, баҫырға әҙерләнгән нөсхәһе буйынса эшләнде.* С. Сафуанов. *Был әлеге өндәмәнең бер нөсхәһе ине.* Ф. Иҫәнғолов.

◆ **Нөсхәи мәшһүр** *иҫк. кит.* мәшһүр кешеләр. *Ғазабы кәберҙе сикһеҙ күрер ҡол битик күп нөсхәи мәшһүр эсендә.* М. Ғафури. **Төп нөсхә** яҙмаһың йәки сәнғәт әҫәрҙәренең тәүге өлгөһө. *Әҫәрҙең төп нөсхәһе.*

**НӨФҮҘ** [*ғәр.*] *и. иҫк кит.* **1.** Тәьҫир көсө; йоғонто. *«Ҡазан, Өфө, Һамар, Ырымбур мосолман байҙарының ҡулдары киң, нөфүҙҙәре ҙур, уларҙан айырылмайыҡ йәмәғәт»,— тип һүҙен бөтөрҙө [Мосауат мөхәррир].* А. Таһиров.

**2.** Абруй, авторитет.

**НӨФҮС** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Халыҡ.

**НУ** [*рус.*] *киҫ. һөйл.* **1.** *кар.* **йә**[2] 2. *Ну, эштәр нисек?*

**2.** *кар.* **эй.** 4. *Ну, көн һыуыҡ та инде.*

**НУҒАЙ** *и.* Ставрополь крайы, Дағстан АССР-ы һәм Чечен-Ингуш АССР-ында йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (төрки телдәрҙең береһендә һөйләшә). *Нуғай халҡы. Нуғай ҡыҙы. Нуғай теле.*

**НУҒАЛА** *и. диал.* Ноғала.

**НУЖА** [*рус.* нужда] *и.* **1.** Тормоштағы етешһеҙлек; мохтажлыҡ. *Донъя нужаһы. Нужа сигеү.* ■ *[Мәғфүрә — Айбулатҡа:] Тупһаларына Ны-*

*язголдарҙың аяҡ баҫырлыҡ түгел. Тик бына нужаһы йөрөтә.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Башҡа төшкән ауырлыҡ; яфа. *Ил нужаһы. Нужа килеү. Нужа төшөү.* ■ *Батша күп нужаларҙан һуң үҙенең һарайына ҡайтып, гәҙел генә хөкөм менән тағы оҙаҡ ҡына йылдар батшалыҡ иткән, ти* (Әкиәттән).

◆ **Нужа бабай** тормош ауырлығы. **Нужа ҡаласы ашау** аҙап күреү, интегеү.

● *Һәр кемдең үҙ нужаһы үҙенә көслө.* Мәҡәл.

**НУЖНА** *и. һөйл. ҡар.* **нужа.**

● *Нужна ҡалас ашата.* Әйтем.

**НУЙЫНЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **сатнау**[1] 1.

**НУЙЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **арыу**[1].

**НУҠРА** *и. диал.* Уҡра.

**НУҠТА** *и.* Ауыҙлыҡһыҙ йүгән. *Ҡайыш нуҡта. Нуҡта үреү. Нуҡталы ат.* ■ *Көмөш йүгән, ебәк нуҡта аҫау ҡолам башында.* Н. Иҙелбай. **Нуҡта күрмәгән** (*йәки* **һуғылмаған) мал** иректә йөрөгән мал. *Йәй буйына нуҡта һуғылмаған айыуҙай малдарҙың теҙгенен тоторға ун биш йәшлек Алтынгужа ултырҙы.* Ғ. Дәүләтшин. **Нуҡта һабаҡ** нуҡтаның теҙгене. *Нуҡта һабаҡ сынйырыңды ебәкләрбеҙ, юргам.* «Ҡара юрға».

● *Яҡшы ат башын нуҡта киҫер, фәҡир башын юҡ киҫер.* Мәҡәл.

**НУҠТАЛАУ** *ҡ.* **1.** Нуҡта кейҙереү. *Ҡыҙрас ишәкте нуҡталаған да, етәкләп һыу буйына алып төшкән* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Кешенең иркен сикләү, ихтыярын ҡулға алыу. *[Шәрәфи:] Шул йүнһеҙҙе бик ныҡ ҡына нуҡталап ҡуяһы ине.* Х. Ибраһимов.

**НУЛЬ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** О һаны (берәмектең юҡлығын күрһәтә). *Нуль күрһәткесле дәрәжә.*

**2.** Температураны үлсәү нигеҙе итеп алынған шартлы дәүмәл.

**3.** Нимәнеңдер юҡлыған, булмағанлығын күрһәтә. *Киммәтең юҡ бит һинең бер нуль кәҙәр.* Ш. Бабич.

**НУ́МЕР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *ҡар.* **номер.**

**НУМЕРАТИВ** [*рус.* нумеративы]: **нумератив һүҙ** *грам.* Һан менән исем араһында килеп, иҫәп төшөнсәһен билдәләүсе һүҙ (мәҫәлән, бер баш мал, бер батман бойҙай, бер ҡабым икмәк, ике эҫкерт һалам, өс бит ҡағыҙ).

**НУМЕРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Нәмәләрҙең номер менән билдәләнеше. *Нумерация яһау.*

**НУМЕРЛАУ** *ҡ. ҡар.* **номерлау.**

**НУМИЗМА́Т** [*рус.*] *и.* Нумизматика өлкәһендәге белгес; боронғо ваҡ аҡса һәм миҙалдарҙан коллекция йыйыу менән шөғөлләнгән кеше.

**НУМИЗМА́ТИКА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Боронғо ваҡ аҡса һәм миҙалдар тарихын, шулай уҡ аҡса әйләнешен өйрәнә торған, тарихҡа бәйләнешле фән. *Нумизматика фәненең, металл аҡсалар 50 йылдан да артыҡ ҡулда йөрөмәй, тигән аңлатмаһын иҫкә алғанда .. Стәрлетамаҡ кәберлегенең йәшен VIII-IX быуаттар менән билдәләргә кәрәк.* Н. Мәжитов.

**НУР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ниндәйҙер яҡтылыҡ сығанағынан йәки балҡып торған ялтыр нәмәнән һирпелгән яҡты, асыҡ сатҡы. *Яҡты нур. Таң нуры. Шәм нуры. Гәүһәр таш нуры. Нур сатҡыһы. Нур сәсеү.* ■ *Ал ҡояштың баҙыҡ нурҙары еҙ батмуста сағылып уйнаны.* М. Тажи. *Төн. Ай яҡты. Ауыл нурға сумған. Алыҫ һырттар күренә ялтырап.* Х. Ҡунаҡбай. / *күсм.* Ҡапыл, көтмәгәндә уянған яҡты уй-хис сатҡыһы. *Бәхет нуры. Өмөт нуры.* ■ *Их, егеттәр! Әле уҡыу тигәс, шатлыҡ нуры тулды күңелгә.* Ғ. Мәсғүт. / *күсм.* Тормошто биҙәгән, матурлаған нәмә тураһында. *Уралҡайҙың аҫты алтын, өҫтө шиғыр, үҙе нур!* Ш. Бабич. *Донъяға нурҙарын биргән Кремле бар Мәскәүҙең* Р. Ниғмәти.

**2.** *күсм.* Матур хис-тойғоноң, күңелдәге яҡшылыҡтың күҙгә йәки йөҙгә сыҡҡан сағылышы. *Кемдәргә һуң һинең йөҙкәйҙәрең ҡодуси нурын сәсәр.* Б. Мирзанов. *Сихри нур түгелә бөгөн Зөлхизәнең йөҙөнән.* З. Биишева.

**3.** *физ. күпл.* Күҙгә күренмәҫ есемдәрҙән йәки электромагнит тирбәлеүенән барлыҡҡа килгән ағым. *Космос нурҙары. Катод нурҙары. Радий нурҙары. Рентген нурҙары.*

◆ **Күҙ нуры** *ҡар.* **күҙ. Нур өҫтөнә нур [булыу]** бигерәк тә әйбәт, тигән мәғәнәлә әйтелә.

● *Көсләп асҡан күҙҙең нуры юҡ.* Мәҡәл.

**НУРАНИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Нурлы, яҡты. *Ысын ғишыҡ — выжданға һеңгән нурани серле шәраб.* Ш. Бабич.

**НУРЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Нур менән балҡытыу, нурлы итеү. *Ҡояш болондо нурландыра.* / *күсм.* Матурлыҡ биреү, йәм өҫтәү (йөҙгә). *Йөҙҙәреңде нурландыра ҡаштарыңдың ҡараһы* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Илһам биреү, шатлыҡ өҫтәү. *Уйландырҙың, моңландырҙың, күңелде нурландырҙың.* Х. Назаров.

**3.** *ҡар.* **нурлау** 3.

**НУРЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Нур таратыу, нур һибеп балҡыу. *Аҡъял батыр бәләкәй генә бер тауға килеп сыҡҡан. Был тау мең төрлө матур төҫ менән нурланып, балҡып, күҙҙе сағылдырып тора, ти* (Әкиәттән). / *күсм.* Матур хис-тойғонан яҡтырыу (күҙгә, йөҙгә ҡарата). *Йөҙө нурланып, балҡып китте.* ■ *Гөлйөҙөмдөң әле генә шатлыҡ менән нурланған йөҙөнә тағы ҡайғы күләгәһе төштө.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Нурға сумып матурланыу, йәмлегә әйләнеү. *Гөлдәр йылмайған, ҡырҙар нурланған, бөтә ер-күге нурға сырмалған* Ш. Бабич. *Күкрәп ямғыр яуып үткәндән һуң яҙғы дала ниндәй нурлана.* Ҡ. Даян.

**НУРЛАУ** *ҡ.* **1.** Нурға ҡойондороу, нурлы итеү, яҡтыртыу. *Айға үрләп, нурҙа уйнап, күкрәгемде нурланым.* Ш. Бабич. *Ул ҡаялар миңә ҡалҡан була, айлы кистәр нурлай юлымды.* Ғ. Әмири. / *күсм.* Сырайҙы, күҙ ҡарашын матурлау; яҡтыртыу. *Йөҙҙө нурлау.*

**2.** *күсм.* Матурлыҡ, ҡот биреп йәмләү. *Таң ҡояшы булып Ленин ҡалҡты, телмәрҙәре ерҙе нурланы.* Б. Вәлит.

**3.** Нур (3 *мәғ.*) менән тәьҫир итеү. *Ультра-фиолет нурҙар менән нурлау.*

**НУРЛЫ** *с.* **1.** Нур (1 *мәғ.*) һибеп торған, нур менән балҡыған. *Нурлы йондоҙ.* ■ *Бөтмәй тормаҫ томан, бөтөр әле, нурлы көндәр тыуыр шул саҡта.* М. Сабит. *Ҡояш нурлы, тиҙәр, нуры юҡ.. сөнки күңелемә тынғы юҡ, мин борсоулы бөгөн. Мин бойоҡ.* М. Кәримов. / *күсм.* Яҡты хис-тойғо менән балҡыған, ағымлы (йөҙ, күҙгә ҡарата).

*Нурлы күҙҙәр.* ■ *[Йәш катындан] төҫкә-башка бик матур, нурлы йөҙлө бер ул тыуып, уға Заятүләк тип исем кушкандар, ти.* «Заятүләк менән Һыуһылыу»

**2.** Матур, йәмле. *Нурлы гөлдәр сәскә атып өсөн йылы яҙҙы өҙөлөп һағына.* Н. Нәжми.

**3.** *күсм.* Шатлыҡлы, бәхетле. *Нурлы өмөт менән йәшәү.* ■ *Күңел ғазапланмай, тыныс тора.. Нурлы булһын тиеп киләсәгем, бер хоҙайҙан өмөт иткәндә.* Ш. Бабич.

**НУРҺЫҘ** *с.* Нуры (2 *мәғ.*) булмаған, йәнһеҙ, һүнгән. *Нурһыҙ күҙҙәр.*

**НУРҺЫҘЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Төҫһөҙләнеү, нуры (1 *мәғ.*) бөтөү.

**2.** Нуры (2 *мәғ.*) бөтөү, һүнеү. *Йөҙө һарғайған, нурһыҙланған.*

**НУРЫМ** *и. диал. ҡар.* **ҡумшырыҡ** 1.

**НУРЫТЫУ** *ҡ. ҡар.* **нурыу.**

**НУРЫУ** *ҡ. диал.* Ярҙы ашап, өңөү (ағымға ҡарата). *Ярҙың һыу нурыған ере.*

**НУ́ТРИЯ** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* **1.** Кимереүселәр төркөмөнә ҡараған ҡиммәтле тиреле һыу буйы йәнлеге (төп иле Көньяҡ Америкала; Европала, СССР-ҙа таралған); һаҙ ҡондоҙо. *Нутрия тиреһе.*

**2.** *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Нутрия бүрек.*

**НУТРОМЕ́Р** [*рус.*] *и.* Төрлө деталдең эске һыҙыҡ үлсәмен билдәләй торған ҡорал.

**НУХ: нух заманы** *шул уҡ* **ноҡ заманы** (*ҡар.* **ноҡ** [2]).

**НҮКТӘРГЕ** *и. ҡар.* **мүктәрге.**

**НҮШӘР: нүшәр ямғыр** *диал.* ҡойма ямғыр (*ҡар.* **ҡойма** [2] 1).

**НЫҒАЙЫУ** *ҡ. һөйл. ҡар.* **нығыу** 1.

**НЫҒЫНЫУ** *ҡ.* **1.** *ҡайт. ҡар.* **нығыу** [1]. *Үҫеп нығыныу.* ■ *Һыуыкта сыныгыр инек, коростай булып нығыныр инек.* Т. Арслан.

**2.** Ныҡлап урынлашыу, нигеҙләнеү. *Нығынып алыу. Яңы урында нығынып эшләй башлау.* ■ *Был хөкүмәт үҙе урынлашып, нығынып ҡалһа ярар ине.* Һ. Дәүләтшина. / Ниндәйҙер көскә эйә булып ғәмәлгә инеү. *Мораль нормалар кешеләр аңында .. йәмғиәт алдындағы бурыс, намыҫ һ. б. тураһындағы ҡараш булып нығына.* Д. Вәлиев.

**3.** Нығытмалар ҡороп, ныҡлап урынлашыу. *Юл өҫтөндә тағы бер бәләкәй генә ауыл бар. Дошман шунда нығынған.* Ғ. Ибраһимов.

**НЫҒЫТМА** *и.* **1.** Ниҙәндер һаҡланыу өсөн эшләнгән ҡоролма. *Нығытма яһау.*

**2.** Һөжүмдән һаҡланыу өсөн төҙөлгән хәрби ҡоролма. *Нығытма төҙөү.* ■ *Дошман нығытмалары уңайлы урында булып сыкты. Бында элек ниндәйҙер карьер булған ахыры.* К. Мәргән. *Дошман, паникаға бирелеп, артҡа сигенде. Немецтарҙың ике нығытмаһы ҡулға төштө.* И. Кинйәбулатов.

**НЫҒЫТТЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **нығытыу** 1—6. *Ихатаны нығыттырыу. Дәлилдәр менән нығыттырыу.* ■ *[Кешеләр] Земскийға барып, әллә ниндәй ер эштәре нығыттырып йөрөйҙәр.* Һ. Дәүләтшина.

**НЫҒЫТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **нығытыу** 1, 2, 6. *Бороп нығытылған гайка. Фактттар менән нығытылған ҡарар. Нығытылмай ҡалған ситән.* ■ *Практик эш төплө теоретик белем менән нығытылды.* Ә. Вәли. *Был йүнәлештә сик буйы оборонаһы ... нығытылған ине.* «Ағиҙел», 1984, № 4.

**НЫҒЫТЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡаҙаҡлап, бәйләп, бороп һ. б. юл менән ныҡ хәлгә килтереү; ныҡ итеү. *Гайканы нығытыу. Йөктө нығытыу. Нығытып ҡуйыу.* ■ *Нина көрт баҫҡан ҡойма буйында саңғыһының ҡайышын нығытып тора ине.* Б. Бикбай.

**2.** Ныҡ итеп ҡуша беркетеү. *Арҡандың бер осон иптәштәренә тотороп, икенсе осон биленә нығытып, Аҡъял батыр түбән төшөп киткән, ти* (Әкиәттән).

**3.** Төҙәтеп яҡшы, бөтөн, ныҡ хәлгә килтереү; йүнәтеү. *Ҡапҡаны нығытыу. Сананы нығытыу.* ■ *Йәш һунарсылар ... аттарын ашатып, эйәрҙәрен нығытып, .. [һунар көндәрен] көтә ине.* Ғ. Дәүләтшин. / Етешмәгән нәмәне булдырып бөтәйтеү, етеш итеү. *Өҫ-башты нығытыу. Донъяны нығытыу.*

**4.** Көс туплау, организмды көслө итеү, сыныҡтырыу. *Сәләмәтлекте нығытыу.* ■ *[Хафиз карт:] Һин кустым..., тәнеңде тиҙерәк нығытырға теләһәң, маршрутыңды оҙайт.* М. Тажи. / Көслө итеү, нимәнеңдер ғәмәлдәге көсөн арттырыу. *Мәктәпте кадрҙар менән нығытыу.* ■ *Был ауыл советын нығытыу сараһы... Унан һайлауҙар ваҡытында, халыҡ үҙе карар, бәлки, председатель итеп ҡуйырҙар.* Б. Бикбай. / Ирешелгән нәмәнең көсөн арттырыу, тотороҡло хәлгә килтереү, ныҡлы итеү. *Белемде нығытыу. Бәйләнеште нығытыу.* ■ *Хеҙмәт коллективтары социалистик ярышты йәйелдерә.., хеҙмәт дисциплинаһын нығытыуға булышлыҡ итә.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**5.** *күсм.* Нимә менәндер нигеҙләү, дөрөҫләгән раҫлау. *Кешенең һүҙен нығытыу.* ■ *Мәғфүрә лә Исмәғил хәбәрен нығытты: Эйе, бая төш ваҡытында килделәр.* Һ. Дәүләтшина. *Кузьма кескәй генә мәсьәләне ҙурайта, үҙенә генә хас фәлсәфә менән нығыта.* С. Агиш.

**6.** *күсм.* Ниндәйҙер бер фекергә килеү, шул фекерҙә туҡтап ҡалыу. *Уйҙы шулай нығыттым да, Зөләйхаға йәрминкәгә китәсәгемде хәбәр иттем.* Т. Йәнәби.

**7.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында эш-хәрәкәттең башҡарылыу рәүешен белдерә: 1) ныҡ итеп. *Нығытып баҫыу. Нығытып бәйләү. Нығытып күмеү. Нығытып ҡарау. Нығытып ҡосаҡлау. Нығытып тегеү. Нығытып төрөү;* 2) бик ныҡ итеп, киҫәтеп. *Нығытып әйтеү. Һөйләмәҫкә нығытып ҡуйыу.*

◆ **Билғау аҫтын** (*йәки* **ҡорһаҡты**) **нығытыу** ашап-эсеп туйыныу.

● *Атын урлатҡас, һарайын нығытҡан.* Мәҡәл.

**НЫҒЫТЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **нығытыу** 1, 2. *Кәртәне нығытышыу.*

**НЫҒЫУ** *ҡ.* **1.** Яҡшы, ныҡ, бөтөн хәлгә килеү. *Өҫ-баш нығыны. Сбруй нығыны, юлға сығып була.*

**2.** Үҫеп көслө, баҙыҡ, ныҡлы хәлгә килеү; ныҡ булыу. *[Ағастарҙың] буйҙары нығыр, ботаҡ-*

*тары ла тарбағай булып йәйелер.* М. Тажи. *[Физик күнекмәләр] мускулдарҙың тигеҙ нығыуына ярҙам итә.* В. Ғүмәров. / Көс йыйыу, сәләмәтләнеү. *Шаһиҙә ... ес көн бик ҡаты ауырып ятты. Дүртенсе көндө инде ул үҙен яҡшы уҡ таҙарған, яҡшы уҡ нығыған һымаҡ һиҙҙе.* Ғ. Хәйри.

**3.** Ғәмәлдәге көсө артыу, көслөгә әйләнеү, үҫеү. *Комсомолдар сафы нығый. Хужалыҡтың экономикаһы йылдан-йыл нығый.* / *күсм.* Тотороҡло булыу, ҡаҡшамаҫлыҡ хәлгә килеү. *Ышаныс нығыу.* ■ *Һаман нығый барһын дуҫлыҡ,— ерҙә еңһен тыныслыҡ. Н. Иҙелбай.*

♦ **Быуын нығыу, быуынға нығыу** *ҡар.* **быуын.**

**НЫЙЫЛДАҠ** *с.* Ныйылдап йөрөүсән. *Ныйылдаҡ кеше.*

**НЫЙЫЛДАУ** *ҡ.* Бушҡа илаулау, зарланыу; мыйылдау, шыңшыу.

**НЫҠ** *с.* **1.** Көс тәьҫиренә (ватыу, һындырыу, өҙөү һ. б) бирешмәгән. *Ныҡ ағас. Ныҡ бау. Ныҡ булыу. // Ныҡ бәйләү. Ныҡ йәбешеү.* ■ *[Үмәр карт] ҡапҡаһының сус бәйе ныҡмы икән тип, кабат-кабат тартып ҡараны.* Һ. Дәүләтшина. *Бәйләп тоткан ныҡ бығауҙы бик тиҙ генә өҙә алмаҫһың.* Ш. Бабич. *[Заятүләк:] Ныҡ тотҡанмын сәсеңде, асыуланма, һылыу ҡыҙ.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». / Туҙмаған, йыртылмаған. *Ныҡ күлдәк. Ныҡ итек.* / Ватылмаған, төҙөк. *Ныҡ сана. Арба әле ныҡ, йөрөрлөк.* ■ *Кемдең бесәне етешле, кәртә-ҡураһы, өйө ныҡ, кейеме ҡалын, шул кеше генә ҡыштың һыуығын белмәй.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Таҙа, сәләмәт, көслө; һауһаҡ. *Ныҡ кеше. Ныҡ организм. Йәштәр кеүек ныҡ булыу.* ■ *Беҙҙең арала иң сыҙам, иң сыныҡҡан, иң ныҡ кеше — Буранбай.* Д. Юлтый. *Беҙ ҡаҙарбыҙ ал әләмде ныҡ, батыр, йәш ҡул менән.* Ғ. Амантай.

**3.** Бай, көслө. *Ныҡ дәүләт. Ныҡ хужалыҡ.*

**4.** Нигеҙе ҡаҡшамаҫ, тотороҡло. // *Тәртипте ныҡ ҡуйыу.* ■ *Ныҡ семьялар — ныҡлы коллективтар нигеҙе.* Ғ. Сәләм.

**5.** Ышаныслы, шик уятмаған. *Ныҡ вәғәҙә.* ■ *[Зөфәр:] Ныязғол ағай ... һин ошо йыйылышта үҙеңдең ныҡ һүҙеңде биреп, халыҡты тынысландырырға тейешһең.* Һ. Дәүләтшина.

**6.** *р. мәғ.* Эш-хәлдең, күренештең бик көслө, ҡаты, юғары дәрәжәлә булыуын күрһәтә; бик. *Ныҡ асыуланыу. Ныҡ көлөү. Ныҡ ҡартайыу. Ныҡ тырышыу.* ■ *[Ғәйни:] Ҡайһылай ныҡ тейәгәнһең. Был йөктө минең туры бейәгә тейәһәң, ике йөктә лә бөтмәҫ.* Т. Йәнәби. / Сифаттың юғары дәрәжәһен белдерә. *Ныҡ матур. Ныҡ бәхетле. Ныҡ серле.*

♦ **Арҡаны ныҡҡа терәү** *ҡар.* **арҡа. Ныҡ тороу** үҙ ихтыяр-теләгеңдән ситкә тайпылмау. *[Әбей:] Һин, улым, бик түҙемле күренәһең, ныҡ тор, дейеүгә бирешмә* (Әкиәттән).

**НЫҠАШЫУ** *ҡ. диал.* Ныҡышыу.

**НЫҠЛАП** *р.* Эш-хәрәкәттең башҡарылыу рәүешендәге юғары кимәлде белдерә; ныҡ итеп, тейешенсә. *Ныҡлап танышыу. Ныҡлап уйлау. Ныҡлап һөйләшеү. Эшкә ныҡлап тотоноу.*

**НЫҠЛЫ** *с. ҡар.* **ныҡ** 2—5. *Ныҡлы беләк. Ныҡлы кәүҙә. Ныҡлы һаҡ. Ныҡлы тәртип. Ныҡлы урын алыу. Ныҡлы коллектив. Ныҡлы ышаныс.* ■ *Был ырыуҙың Тимерғотло тигән бер ғәйәт ныҡлы, бәһлеүән кешеһе булған.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *Бикләргә, ныҡлы ҡарауыл ҡуйырға!* Ә. Вахитов.

**НЫҠЛЫҠ** *и.* Ныҡ булыу сифаты. *Тауарҙың ныҡлығы. Организмдың ныҡлығы. Тәртиптең ныҡлығы.* ■ *Көршәк тулы булһа, ныҡлығын ул оҙаҡ йылдар һаҡлай. Ә буш көршәк иһә тора-тора үҙалдына сатнай.* М. Кәрим.

**НЫҠЫМЫШ** *с.* Алдына алғанын атҡарырға тырышыусан; ныҡыш. *Ныҡымыш булыу.* ■ *Суфиянан яуап булмаһа ла, Зәлифә хат яҙыуын дауам итте. Шулай ныҡымыш ҡыҙ ул Зәлифә.* З. Биишева.

**НЫҠЫМЫШЛАНЫУ** *ҡ.* Ныҡымышлыҡ күрһәтеү, наҡымышлыҡ итеү. *Ныҡымышланып эшкә тотоноу. Ныҡымышланып һорау.*

**НЫҠЫМЫШЛЫҠ** *и.* Ныҡымыш булыу сифаты.

**НЫҠЫТЫУ** *ҡ.* Үҙ теләгәнеңде талап итеп көсләшеү. *Ныҡытып һорау.* ■ *Был [ҡатын] һылыу егетте ... үҙенә саҡыра башлай. Күп ныҡытҡас, егет риза була* (Әкиәттән).

**НЫҠЫУ** *ҡ.* **1.** Өҫтө-өҫтөнә өйөү, төйөп тыңҡыслау. *Ҡотлоярҙың бәләкәс кенә ... өйө, ныҡып тултырған кеүек, халыҡ менән тулған.* Һ. Дәүләтшина. / *күсм.* Ҡабат-ҡабат ныҡ итеп әйтеү, туҡыу. *[Юлбаев — Сәлмәнгә:] Механизмдарҙы бик ҡарап эшләтергә кәрәк. Һин .. егеттәреңә ныҡып ҡуй.* К. Мәргән.

**2.** Үҙ теләгеңде талап итеп көсләшеү; ныҡытыу. *Ғази яҙҙан уҡ ... апаларына ҡунаҡҡа ебәреүҙәрен ныҡый башлаған.* Ф. Исәнғолов. / Талап итеп, ҡабат-ҡабат һорау. *Үҙебеҙсә ... берәй көй уйнап ебәр әле! — тип ныҡый башланылар.* Ш. Янбаев.

♦ **Ҡаты ныҡыу** күп өйкәлеүҙән ҡалынайып, сурайып ҡатыу (тирегә ҡарата). *Зөлкәрнәйҙең ус эстәренә, бармаҡ төптәренә ҡаты ныҡыған.* Ғ. Дәүләтшин.

**НЫҠЫШ** *с.* Алдына алғанын һис нәмәгә ҡарамай атҡарырға тырышыусан; ныҡымыш. *Әйткән һүҙ — атҡан уҡ булһын, мин үҙем ныҡыш бәндә.* М. Кәрим.

**НЫҠЫШМАЛ** *с. ҡар.* **ныҡымыш.**

**НЫҠЫШМАЛЫ** *с.* Көслө ынтылыш, ҙур тырышлыҡ, көсөргәнеш менән алып барылған. *Ныҡышмалы көрәш. Ныҡышмалы эш. Ныҡышмалы рәүештә эшләү. // Ныҡышмалы эҙләнеү.* ■ *Эскелекте бөтөрөү өсөн оҙайлы, ныҡышмалы көрәшергә кәрәк.* «Совет Башкортостаны», 1987, 15 ғинуар. *Тәүге осорҙарҙа совет ғәскәрҙәренә .. һәр ҡала, һәр ауыл өсөн ныҡышмалы алышырға тура килде.* «Ағиҙел», 1984, № 7.

**НЫҠЫШМАЛЫҠ** *и.* Маҡсатҡа төбәлгән көсөргәнешле ынтылыш. *Ныҡышмалыҡ менән эшләү. Ныҡышмалыҡ һөҙөмтәһендә ирешелгән уңыштар.*

**НЫҠЫШЫУ** *ҡ.* **1.** Үҙ теләгеңде тормошта атҡарырға тырышыу, ныҡышмалыҡ күрһәтеү. *Йәмилә апайым институтты ситтән тороп тамамларға ныҡыша.* К. Кинйәбулатова. *Урман батыр ныҡыша торғас, бүрәнә ярығынан бармағын тартып алған* (Әкиәттән).

**2.** Нимәнелер талап итеү, үҙһүҙләнеп ҡабат-ҡабат һорау. *[Өйрәнсек һөнәрсегә:] Һин.., ҡорҙаш, миңә ярҙам итергә теләйем тинең! Ысын күңелдән әйткәнһеңдер бит инде һин был һүҙҙе?! — тип ныҡыша.* З. Биишева. *[Сауҙагәр:] Минең юғалтҡан аҡсам һигеҙ йөҙ һум ине, был крәҫтиән бер йөҙөн үҙенә алған,— тип, ныҡыша башланы, ти* (Әкиәттән).

**3.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында «бик тырышып, көс һалып» тигән мәғәнәне бирә. *Ныҡышып эшләү.* ■ *Балтырындағы йәрәхәт урынының сәнсеп-сәнсеп һыҙлауын иҫәпкә алмаҫҡа тырышты Мансур, ныҡышып аҙымын тиҙләтте.* Ә. Хәкимов.

**НЫШАЛАУ** *ҡ. ҡар.* **нышыу.** *Нышалап тултырыу.*

**НЫШЫУ** *ҡ.* Берәй нәмәне тоҡҡа, һауытҡа тыйғыслау; тыңҡыслау. *Нышып тултырған һандыҡ.* ■ *Почтальон сумкаһы газета-журнал менән нышып тултырылған.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1968, № 7.

**НЭП** [*рус.* нэп — новая экономическая политика] *и.* Яңы экономик политика (*ҡар.* **политика**).

**НЭПМАН** [*рус.*] *и.* Нэп осорондағы хосуси милек эйәһе.

**НӘБАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Үҫемлек. *Баш эйгән һәммә нәбат, коштар йырламай ҡабат* (Бәйеттән).

**НӘБИ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Пәйғәмбәр. *Йыһан эсенә куймыш ине Йософ нәби.* «Йософ вә Зөләйха».

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**НӘБҮӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Пәйғәмбәрлек. *Нәбүәттән мөҡәддәс ғилем бер нур бар сырағын һауаһы һүндермәһә.* Аҡмулла.

**НӘГАҺ** [*фарс.*] *р. иҫк. кит.* Аңғармаҫтан, көтмәгәндә, ҡапыл. *Анса нәгаһ ул ерҙә аждаһа йылан пәйҙә булды.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**НӘҒЕҘ** [*фарс.*] *с.* **1.** Ҡуйылған талаптарға яуап бирерлек, ысын мәғәнәһендә яҡшы булған, һәйбәт. *Нәгеҙ алтын.* ■ *Был такыя башлы .. шып-шыма көпшә нәгеҙ Урал ҡурайы, беҙҙең яҡтарҙа ғына үҫер наҙлы бер һабаҡ.* Ғ. Хөсәйенов. *[Мотал:] Һин, Бәхтиәр ағай, әҙәмһең, ләкин әҙәмдең нәгеҙе түгелһең.* М. Һәйҙәров.

**2.** *р. мәғ.* Нәҡ, хас, тап. *Ана килде паровоз, борхлай нәгеҙ ялмауыҙ.* Д. Юлтый. *[Әсәй], нәгеҙ һинең төҫлө ҡыҙҙарым.* Ғ. Әмири. *Йәш тә түгел, ҡарт та түгел, нәгеҙ быуынға ултырған ир икән.* В. Нафиҡов.

**НӘҒЕШ** *и. ҡар.* **нағыш.**

**НӘҒЕШЛӘҮ** *ҡ. ҡар.* **нағышлау.**

**НӘҒРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Яман, әсе тауыш.

♦ **Нәғрә ороу** яман нтеп ҡысҡырыу; һөрән һалыу. *Йәшен йәшнәп, күктәр күкрәп торҙо батыр егет нәгрә орғанда.* Х. Ғәбитов.

**НӘҒӘЛӘТ** *диал.* Ләғнәт.

**НӘҘБЕРЕК** *с.* **1.** Бик нескә төҙөлөшлө, бәләкәй генә тәьҫиргә лә бирешеүсән. *Нәҙберек механизм. Нәҙберек ҡорал. Хронометр — нәҙберек прибор.*

**2.** Бик бәләкәй нәмәгә лә һиҙгер; нескә. *Мөхәббәт — йөрәк эше, бик нәҙберек нәмә.* Б. Бикбай.

**3.** Тәбиғәте, булмышы бик нәҙекәй; нескә. *Нәҙберек ҡыҙ.*

**4.** *диал.* Аш һайлаусан, талымлы.

**НӘҘБЕРЕКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Нәҙберекҡә (2—4 *мәғ.*) әйләнеү, нәҙберек булыу.

**НӘҘЕГӘЙЕҮ** *ҡ.* **1.** Нәҙекҡә әйләнеү, нәҙек булыу. *Һөнәрсе тағы ла нәҙегәйеп, дуға кеүек бөгөлөп төшкән.* З. Биишева.

**2.** *күсм.* Күреү һәләте кәмеү. *[Айытбай ҡарт — Сөнгәткә:] Әллә күҙҙәрем нәҙегәйә башлаған инде, хәйерһеҙең. Мин дә һине таный алмай торам да баһа.* Ҡ. Ибәтуллин.

**НӘҘЕГӘЙТЕҮ** *ҡ.* Нәҙекҡә әйләндереү, нәҙек итеү. *Юныл нәҙегәйтеү.* — *Ҡара ҡайыш быума, дуҫым, билеңдә нәҙегәйтеп* (Халыҡ йырынан).

**НӘҘЕГӘРЕҮ** *ҡ. диал.* Нәҙегәйеү.

**НӘҘЕК** [*фарс.*] *с.* **1.** Диаметры, арҡырыһы бәләкәй (оҙонса нәмәгә ҡарата); *киреһе* йыуан. *Нәҙек ағас. Нәҙек бағана. Нәҙек ҡаҙау. Нәҙек йөнлө һарыҡ. Нәҙек уҡа. Нәҙек һаплы бысаҡ. Нәҙек итеү.* ■ *[Врач] тегеп ҡуйҙы йәрәхәтте бик-бик нәҙек ебәк еп менән.* Ғ. Әмири. *Нәҙек, оҙон буйға үҫкән Ҡыҙыл буйының талы* (Халыҡ йырынан). / Киңлек үлсәме ҙур булмаған, яҫы түгел. *Нәҙек ҡаш. Нәҙек мыйыҡ. Нәҙек һыҙыҡ. Ирене нәҙек кеше.* ■ *[Килдебайҙың] нәҙек мыйығының ике осо һаҡалына килеп тоташҡан.* Ғ. Дәүләтшин. *[Сабирьян] байтаҡ ер китеп өлгөргән, беҙҙең ауылға алып барған нәҙек юлға боролоп төшә башлаған.* М. Хәйҙәров. / Тулы булмаған, һимеҙ түгел. *Нәҙек бармаҡ. Нәҙек аяҡ.* ■ *[Магазинға] ҡатынын эйәртеп бәрәү килде. Быларҙың ир булғаны бик нәҙек тә, бик оҙон.* С. Агиш. *Сихри шаршауҙың эсендә наҙлы нәҙек бил көтә.* Ш. Бабич.

**2.** Юғары тонлы; нескә (тауышҡа ҡарата). *[Ерән һаҡаллы] тамағы ҡарлыҡҡан әтәс һымаҡ, нәҙек кенә тауыш менән: «Әссәләмәғәләйкум, йәмәғәт!» — тип сәләм бирҙе.* М. Тажи. *Иң һуңғы танкты уткәргәс, Нарбеков нәҙек кенә итеп һыҙғырып ебәрҙе.* Ә. Ихсан.

**3.** *диал. ҡар.* **йоҡа** [1] 1. *Нәҙек кенә ебәк кулдәк.*

♦ **Нәҙек һуҙынҡы** *лингв.* алғы рәт һуҙынҡы өнө.

**НӘҘЕКЛӘҮ** *ҡ. ҡар.* **нәҙегәйтеү.**

**НӘҘЕКӘЙ** [1] *с.* **1.** Нәҙек кенә. *Нәҙекәй бил.*

**2.** *күсм.* Әҙ генә тәьҫиргә лә бирешеүсән; нәҙберек. *Нәҙекәй нәмә.*

**НӘҘЕКӘЙ** [2] *и. диал.* Ҡыл тамаҡ (*ҡар.* **тамаҡ**).

**НӘҘЕКӘЙЛӘНЕҮ** *ҡ. һөйл.* Ябығып нәҙекҡә әйләнеү. *Сәхибә туташ нәҙекәйләнеп, йәшәреп киткән.* З. Биишева.

**НӘҘЕЛЛЕ** *с. диал.* Күңелле. *Нәҙелле лә үткән йәш ваҡыт* (Халыҡ йырынан).

**НӘҘЕР** [*ғәр.*] *и.* Берәй теләктең ҡабул булыу шартына бәйләп, үҙ өҫтөңә алған бурыс; шартлы вәғәҙә. *Нәҙер әйтеү.* ■ [Ҡыҙ:] — *Атайымдың мине ил батырына бирәм тигән нәҙере бар. Атайым ошо нәҙерендә торһон.* М. Буранғолов. *[Табиба:] Уландарым иҫән ҡайтһа, аҡ ҡорбан салып үҙ бала-сағамды ғына йыйып ултырырмын, тип нәҙер әйткәйнем.* З. Биишева.

♦ **Нәҙер ураҙаһы** *ҡар.* **ураҙа.**

**НӘЖАСӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Әшәкелек. *Донъяла инде йәм калмаған, нәжасәткә донъя буялған.* Я. Юмаев.

**НӘЖАТ** *и. кар.* **нәжәт.**

**НӘЖЕС** [*ғәр.*] *с.* **1.** *иҫк.* Бысраҡ, әшәке. *Нәжес кулдар. // Саф алтынды нәжескә буяу менән, нәжес китер, алтындың заты китмәҫ.* Аҡмулла.

**2.** *күсм.* Рухи яҡтан түбән булған, күңеле бысраҡ. *Булмаһа әгәр һиндә акыл кыҫка, ышанма асылы нәжес залим дуҫка.* М. Ғафури. *[Шәмсетдин:] Шигриәт кешене нәжеслектән коткарған берҙән-бер сара.* К. Мәргән.

● *Эт менән коҙа булһаң, нәжес менән туй кылырһың.* Мәҡәл.

**НӘЖЕСЛӘҮ** *к. иҫк. кит.* Бысратыу. *Ерҙе нәжесләү.*

**НӘЖИП** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Сығышы, нәҫеле күренекле, таныҡлы; нәҫелле.

**2.** Хөрмәтле, абруйлы.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**НӘЖӘҒӘЙ** *и. диал. кар.* **һаҙағай** 1.

**НӘЖӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡотолоу мөмкинлеге, именлек. *[Наташа:] Туккән куҙ йәштәрем, һораған теләктәремдең барыһы ла алла каршыһында кабуллыкка ашһалар ине... Ниндәй телдәр менән, ниндәй күңелдәр менән миңә нәжәт һорарға!* Д. Юлтый.

**НӘЗАКӘТ** *и. кар.* **нәзәкәт.**

**НӘЗАР** *и. кар.* **назар.**

**НӘЗАРӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кар.* **назарат.** *[Ағай] өйҙә булғас, беҙҙең өҫтәге ғәҙәттән тыш ауыр булған нәзарәт тә бер аҙ кәмей төштө.* М. Ғафури.

**НӘЗИР** [*ғәр.*] *с. иҫк.* **1.** Оҡшаш, тиң.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**НӘЗИРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Үрнәк, өлгө.

**2.** Бүтән кешенекенә оҡшатып яҙылған шиғыр.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**НӘЗЫМ** [*ғәр.*] *и. кар.* **назым.**

**НӘЗӘКӘТ** [*фарс.*] *и.* **1.** Мөғәмәләләге нескәлек, әҙәплелек, иплелек. *Һәр хәрәкәтенә һәм һүҙенә айырым бер нәзәкәт, үҙгәлек бирергә теләгән Орҡия ... эсемлекте оҙон бокалдарға һала ла, бармаҡ осо менән генә кунактары алдына этә.* И. Насыри.

**2.** Йөрөш-торошта, һын-киәфәттә йәки кейемдә сағылған нәфислек, матурлыҡ. *Ҡиәфәтендә нәзәкәт етешмәй.* ■ *Кул өҫтө кайһы сакта әкрен ел менән, нәзәкәткә сумған йәш кыҙҙың .. алтын буталлы ебәк күлдәге шикелле, елберләп куя.* Ғ. Хәйри.

**НӘЗӘКӘТЛЕ** *с.* **1.** Кешегә ҡарата иғтибарлы булған, үҙен ипле тотҡан, әҙәпле. *Нәзәкәтле мөғәмәлә. Нәзәкәтле һүҙ. // Нәзәкәтле һөйләшеү. Нәзәкәтле булырға тырышыу.* ■ *Башта Ҡаһарманов үҙен бик сабыр, баҫалкы тотто. Һөйләшеүе лә нәзәкәтле ине.* Х. Зарипов. *Сабур бик нәзәкәтле генә күрешә.* Ғ. Әхмәтшин.

**2.** Йөрөш-торошо, һын-ҡиәфәте матур булған. *Нәзәкәтле бала. // Үҙен нәзәкәтле тотоу.* ■ *Ирочкалағы нәзәкәтле кәүҙә.., оҙон керпектәр, кара күҙҙәр Нинала юк ине.* Д. Юлтый.

**3.** Күңелгә яткан матур, нәфис, наҙлы. *Нәзәкәтле сәскә. Нәзәкәтле тәбиғәт күренеше.* ■ *Ҡолаҡ төбөнә .. инеш сылтырауына оҡшаған нәзәкәтле, күңелле йыр килеп бәрелде.* З. Ғәлимов.

**НӘЗӘКӘТЛЕК** *и.* **1.** *кар.* **нәзәкәт** 1. *Нәзәкәтлек менән каршы алыу.*

**2.** Үҙеңде тотоуҙағы әҙәплелек, йөрөш-тороштағы матурлыҡ, нәфислек. *[Ләләнең] кыҙҙар нәзәкәтлегенән алыҫ торған һырышкаҡ кылыктары, тупаҫ хәрәкәттәре лә ягымлы күренә.* К. Мәргән.

**3.** Нәфислек, наҙ. *Күңел нәзәкәтлеге.* ■ *Башкортостан тәбиғәтенең нәзәкәтлеге ... бермә-бер арткандай булды.* К. Әхмәтйәнов.

**НӘЗӘКӘТЛЕЛЕК** *и. кар.* **нәзәкәтлек.**

**НӘЗӘКӘТЛӘНЕҮ** *к.* Нәзәкәтле (1 мәғ.) булыу, нәзәкәтлегә (1 мәғ.) эйләнеү. *Нәзәкәтләнеп китеү.*

**НӘКӘҪ** [*фарс.*] *с.* **1.** Ауыр, яй ҡуҙғалыусан; ялҡау. *[Тулыбай ағай] үҙенең борондан калған нәкәҫ ғәҙәте буйынса, ашарына тамам бөткәнсе урынынан куҙғалманы.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Ҡәбәхәт, әшәке (кешегә ҡарата).

● *Нәкәҫ асылынан касыр.* Мәҡәл.

**НӘКӘҪЛӘНЕҮ** *к. һөйл.* **1.** Ялҡауға әйләнеү; ялҡау булыу.

**2.** Яман, әшәке кешегә әйләнеү; әшәке булыу.

**3.** *диал. кар.* **һалышыу** 4. *Йокоға нәкәҫләнеү.*

**НӘҠ** [*ғәр.*] *кис.* **1.** Урын, ваҡыт төшөнсәле һүҙҙәр менән килеп, уның мәғәнәһен күрсәйтә; тап. *Нәк баш өҫтөндә. Нәк эштең кыҙған мәле. Нәк төш вакыты. Нәк юлдың уртаһында.* ■ *Нәк йылғаның матур боролошонда он осора, гөрләй тирмән.* Ғ. Мәсғүт. *Нәк алты йыл күргәнем юк ине ауылды.* М. Хәй.

**2.** Сағыштырыу, оҡшатыуҙы көсәйтеп килә; хәс, тас. *Нәк атаһы. Нәк арыҫлан.* ■ *Кар өҫтөндә төрлө биҙәк нәк йондоҙ төҫлө яна.* Ф. Рәхимғолова.

**НӘЛӘТ** *и. кар.* **ләғнәт.** *Нәләт төшөү. Нәләт укыу.*

◆ **Муйынына нәләт ҡамыты кейгән** әрләгәндә әйтелә. **Нәләт төшкөрө** (*йәки* **төшкән**) әрләгәндә әйтелә. *[Ғапсаттаров:] Шул нәләт төшкән исем-фамилияны якшырак исемгә алмаштырып булмаҫмы икән.* Ғ. Ғүмәр.

● *Йыландың ағына ла нәләт, караһына ла нәләт.* Мәҡәл.

**НӘЛӘТЛЕ** *с. кар.* **ләғнәтле.** *Батырҙар упкынға ырғытты мең тапкыр нәләтле дошманды.* Х. Кәрим.

**НӘЛӘТЛӘҮ** *к. кар.* **ләғнәтләү.** *Яндым, көлмәнем, ләкин белмәнем, юкка нәләтләп, кабат-кабатлап, бәхетем тиргәнем.* И. Насыри.

**НӘМАЙЫШ** *и. кар.* **намайыш.**

**НӘМИМӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ошаҡ, ғәйбәт, яла һүҙ.

**НӘММӘМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ошаҡсы, ғәйбәтсе, яла яғыусы. *Ошо дүрт әҙәмдең шәррен беҙгә күрһәтмә, йә рабби: берене нәммәм, берене зәмйөн, берене гаммаз, берене шайтан* (Мөнәжәттән).

**НӘМ-НӘШАН** *и. кар.* **нишан** 1. *Байгөбәк күренмәгән, килмәгән. Һис бер нәм-нәшан булмағас, [Көнһылыу] Ҡаратал төбөнә бармаған.* М. Буранғолов.

**НӘМҮНӘ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Миҫал булырлыҡ нәмә; өлгө, үрнәк.

**НӘМӘ** *и.* **1.** Үҙ сифаты, рәүеше булған зат. *Аҫыл нәмә. Яҡшы нәмә. Ваҡ-төйәк нәмә. Затлы нәмә. Ташландыҡ нәмә.* ■ *Уның [Байгужаның] сумаҙанында һәр төрлө кәрәк нәмәләр була: энә, еп, һиҙәп, булавка, ҡайраҡ, беләү.* Д. Юлтый. /Кейем-һалым, ҡаралды. *Түшәмгә тиклем өйөп ҡуйылған урын-ер нәмәләре.. күҙҙең яуын алып тора* (Әкиәттән). / Донъя кәрәк-ярағы, мөлкәт. *Кеше нәмәһе. Колхоз нәмәһе.* ■ *Хәҙер инде быларҙың [егет менән ҡыҙҙың] етешмәгән нәмәләре юҡ, ти* (Әкиәттән).

**2.** Ысынбарлыҡтағы бер күренеш, эш-хәл, факт. *Тирә-яҡ ҡапыл нурға төрөндө, бөтә нәмә моңға күмелде, йылғаның ағышы ла йырға әйләнде.* И. Ғиззәтуллин. *Был донъя бер нәмәне лә яңғыҙ итеп яратмаған шул. Мөхәббәткә нәфрәт тапҡан, тогролоҡҡа мәкерлекте.., шатлыҡҡа ҡайғыны иш иткән.* Т. Килмөхәмәтов. **Бер** нәмә билдәләнмәгән зат, эш-хәл һ. б. *Бер нәмә лә аңламау.* ■ *[Эреҫ] еңгәнең .. йөрәгенә ҡурҡыу һымаҡ бер нәмә төштө.* Ғ. Дәүләтшин. *Хужа ҡатын минең ҡулға сепрәккә төргән бер нәмә бирҙе.* Д. Юлтый.

**3.** Кеше, әҙәм заты. *Илла эт нәмә лә инде был Йәнтимер.* С. Агиш. *Өйрәнсекте әйтәм әле, бигерәк моңһоҙ нәмә булған икән.* З. Биишева. / Кәмһетеү, хушһынмау мөнәсәбәте белдереү өсөн ҡулланыла. *Үҙ һүҙле нәмә. Алабарман нәмә. Күбә ярымдай нәмә. Өй кеүек нәмә.* ■ *Күңел генә аҫыр ай кешем юҡ, ирем тигән нәмә — бер байғош* (Халыҡ йырынан).

♦ **Бер нәмә булдымы** (*йәки* **булһа**) бәләкәй генә бер сәбәптән дә. *[Әскәп:] Ағайың, бер нәмә булһа, өтөп алып китә лә бара ул мине.* Б. Бикбай. **Бер нәмә түгел** ниҙеңдер аҙ йәки анһат икәнен белдерә. *Мал табыу ул бер нәмә түгел.* .. **тигән нәмә юҡ** эш-ҡылыҡтағы етешһеҙлекте шелтәләгәндә ҡулланыла. *Китапты урынына ҡуйыу тигән нәмә юҡ.* **Һис нәмә** тулы инҡарҙы аңлата. *Һис нәмә эшләр хәл юҡ.* **Һыйыр мөгөҙөнә элер нәмәһе юҡ** бик фәҡир өйгә ҡарата әйтелә. *Өйөндә һыйыр мөгөҙөнә элер нәмәһе юҡ. Ҡатыны тиф менән ауырып ята.* Һ. Дәүләтшина. **Юҡ** нәмә иҫәпкә алмаҫлыҡ буш нәмә. *Юҡ нәмә менән булышыу.*

● *Һәр нәмәнең үҙ батманы.* Мәҡәл.

**НӘМӘКӘЙ** *и. кес. кар.* **нәмә** 1, 3, 4. *[Әбей:] Уф алла, лабырлатма әле анау нәмәкәйенде!* Ф. Иҫәнғолов.

**НӘМӘ-ҠАРА** *и.* Донъя ҡаралдыһы, ваҡ-төйәк нәмә; кәрәк-яраҡ. *[Котлойға] оҙаҡ уйларға ирек бирмәнеләр, бөтә балаһын, нәмә-ҡараларын хәҙер үк тейәп алып китергә булдылар.* А. Таһиров.

**НӘМӘЛӘТӘ** *р.* Иген, мал һ. б. төрлө нәмә менән; аҡсалата түгел (түләгәндә, бурыс биргәндә һ. б.). *Нәмәләтә биреү.* ■ *Хәҙер ситса, сәй-шәкәр һымаҡ нәмәләрҙең хаҡы көндән-көн төшә бара. Нәмәләтә түләү ул наделды тағы ла арзанайтасаҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**НӘМӘРӘ** *и. кар.* **нимәрә.**

**НӘМӘҪТӘ** *а. диал.* Нимә.

**НӘМӘХРӘМ** [*фарс.*] *с. иҫк.* Шәриғәт буйынса бер-береһе менән аралашырға, күрешергә йәки бер-береһенә ҡарарға ярамаған (сит ир йәки ҡатын). *Нәмәхрәм ҡатын. // Нәмәхрәмгә әйләнеү. // Нәмәхрәм һанау.* ■ *[Мулла:] Ҡыҙҙар менән малайҙарҙы бергә уҡытыу нәмәхрәм, яҙыҡ.* И. Ғиззәтуллин. *Тороп ҡаҙан аҫмайҙар, дәхи ҡамыр баҫмайҙыр, нәмәхрәмдин ҡасмайҙыр — бик оятһыҙ, тидия* [Бәйеттән].

**НӘНИ** *с. диал.* **1.** Сабый. *Нәни бала.*

**2.** Бәләкәй. *Мин күрәм уны юлдарҙа, мин күрәм уны нәни ҡулдарҙа.* Х. Ғиләжев.

**НӘНКИР** [*ғәр.*] (*баш хәреф менән*) *и.* Ислам диненсә, үлгәс, теге донъяла һорау ала торған ике фәрештәнең береһе (икенсеһе **Мөнкир**). *Ғазраил алыр минең йәнемде, кемдәр йыуыр минең тәнемде. Мөнкир вә Нәнкир килгән сакта, кемдәр белер минең хәлемде* (Бәйеттән).

**НӘНӘЙ** *с. диал.* Өләсәй.

**НӘП-** *киҫ.* **Нә**ғ өндәре менән башланған сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһен бирә. *Нәп-нәҙек.*

**НӘПСЕ** [*ғәр.*] *и.* Һаман күберәккә ынтылған көслө теләк. *Нәпсеһе ҙур. Нәпсене аҙҙырыу. Нәпсене тыйыу. Нәпсене һуҙыу. Нәпсе тынғы бирмәй. Нәпсеһенә хужа була алмай.* ■ *[Хәким:] Алтынға бай ерҙе табырға тырышып, һеҙҙең телегеҙгә алданып [һыйырымды] һуйҙым. Һаман да шул нәпсе.* Я. Хамматов. **Нәпсене һимертеү** теләгеңде сикләмәй, нәпсегә ирек биреү.

● *Баланың нәпсеһе ауыҙында.* Әйтем. *Нәпсене ҡыуа бирһәң, нәпсең түймаҫ булыр, нәпсеңде тыя бирһәң, нәпсең йыуаш булыр.* Мәҡәл. *Нәпсене һимертһәң, үҙеңә бәлә өҫтәр.* Мәҡәл.

**НӘПСЕЛЕ** *с.* Ҡомһоҙ теләкле. *Нәпселе кеше.*

**НӘПСЕҮ** *к.* Һыуыҡта ҡарҙы өңөп инеп ятыу (ҡор, селгә ҡарата).

**НӘРКИС** *и. кар.* **нәркәс.** *Үбер инем гөлдәй керпектәрен, сер мәхзәне нәркис күҙҙәрен.* Б. Мирзанов.

**НӘРКӘС** [*фарс.*] *и.* **1.** (*йәки* **нәркәс гөл**) Һуғанбаштан үрсетелә торған матур сәскәле, хуш еҫле баҡса гөлө; нәркис. *Аҡ нәркәс. Һары нәркәс.*

**2.** *с. мәғ. күсм.* Матур, гүзәл, нәфис. *[Һакмарым] мин һағынам эсә ҡосағыңдай туғайҙарың, наҙлы тулҡының. Һыуға килгән нәркәс һылыуың да көтә төҫлө мине юҡһынып.* Р. Аҙнағолов. *Ҡара нәркәс күҙҙәрең, .. ҡыҙыл гөлдәй йөҙҙәрең күрер көнөм булырмы* (Халыҡ йырынан).

**3.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**НӘРҪӘ** [1] *и. диал.* Нәмә.

**НӘРҪӘ** [2] *и. диал.* Нимә

**НӘРӘТӘ** [*рус.* нерето] *и.* Ептән үрелгән ҡанатлы мурҙа. *Нәрәтәне ҡороу. Нәрәтә һалыу.* ■ *[Бабай:] нәрәтәләрен киптерергә элеп, өҙөлгән урындарын рәтләп тора ине.* М. Ғафури. *Шәйхелислам бабай быуаға төшөп, төнгөлөккә нәрәтәләрен һалды.* Ф. Иҫәнғолов.

**НӘСИМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Еңел, йомшаҡ ел. *Иртәнге нәсим. // Ярлы халыҡҡа яңы ауаз килде көнбайыштан нәсим ел менән.* Х. Ғәбитов.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**НӘСИХӘТ** [*ғәр.*] *и.* Тәртип, ҡылыҡ тураһында өйрәтеп әйтелгән һүҙ; өгөт. *Нәсихәт һүҙе. Нәси-*

*хәт биреү. Нәсихәт тыңлау.* ■ *Балаң булһа, шулдыр уға нәсихәт, нәсихәт тыңлағыҙ, дуҫтар, нәсихәт. Кис-көндөҙөн өйрәтегеҙ иманға, балиғ булһаң, эйәрмә, тип, яманға.* М. Өмөтбаев. *Яҡшы ғалим нәсихәтен иҫкә алмаҫтар, хаҡтан ҡурҡмаҫ әҙәмдәрҙән оялмаҫтар* (Бәйеттән).

**НӘСӘБӘН** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Нәҫелгә бәйле; туған.

**НӘСӘП** [*ғәр.*] *и. һөйл.* **1.** Бер атанан килгән быуындар теҙеме; тоҡом, нәҫел, зат. *Кешенең нәсәбен тикшереү.*

**2.** Ниндәйҙер бер тоҡом вәкиле; зат. *Ҡалмыҡтар нәсәбе.*

**НӘСӘПЛЕ** *с. һөйл.* **1.** Ағай-энеһе, туғандары күп булған; нәҫелле. *Ҡалын нәҫелле, нәсәпле кеше.*

**2.** Сығышы менән ниндәйҙер халыҡҡа, тоҡомға ҡараған. *Сыуаш нәсәпле кеше. Монгол нәсәпле ара.*

**НӘСӘПҺЕҘ** *с.* **1.** Туғандары, ағай-энеһе булмаған.

**2.** Күренекһеҙ, ябай нәҫелле. *[Боҫтан:] Сәсән, һин нәсәлһеҙ бер йолҡош ҡыҙы.. Мин һеҙҙең кеүек нәҫелһеҙ түгел.* Б. Бикбай.

**НӘҪ** *и. һөйл.* Ялҡаулыҡ. *Нәҫкә һалышыу.*

● *Нәҫ баҫҡанды бет баҫа.* Әйтем.

**НӘҪЕЛ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Бер төптән, бер сығанаҡтан таралған кешеләр быуыны; нәсәп, тоҡом, зат. *Ҡалын нәҫел. Борондан килгән нәҫел. Нәҫелдән нәҫелгә күсеү. Үҙ нәҫеленә тартыу.* ■ *[Ҡыҙ:] Баҡыр батша дейеү нәҫеленән, әҙәм затын һис яратмай* (Әкиәттән).

**2.** Уртаҡ сифаттары эштәре һ. б. яҡтары менән айырымланып торған кешеләр төркөмө. *Уның менән һөйләшке килә.. Ул дошман нәҫеле. Сурағолдар тураһында берәр нәмә ыҫҡындырып алып булмаҫмы икән?* Т. Хәйбуллин. *Диңгеҙ буйлап йүгерә бер малай, ялан тәпәй. Беҙҙең нәҫелдән.* М. Кәрим. *Беҙ .. ҡурҡаҡ нәҫелдән түгел.* А. Игебаев.

**3.** Бер сығанаҡтан килгән үҫемлек, хайуан, ҡош-ҡорт төркөмө; тоҡом. *Ул мал тарпан нәҫеленән булған. Әҙәмде тиңһенмәй икән улар.* К. Мәргән. *Миңә тиклем күпме кеше һаҡлап тотҡан ул аттарҙы, .. ә бына хәҙер килеп шул аттарҙың нәҫеле ҡороно.* Ә. Вахитов. / Билдәле бер быуындан һайлап алынған яҡшы мал заты; тоҡом. *Нәҫел айғыры. Нәҫел үгеҙе.*

**НӘҪЕЛДӘШ** *и.* **1.** Бер нәсәптән булған кеше; туған, ҡәрҙәш.

**2.** Бер сығанаҡтан килгән үҫемлек, хайуан йәки ҡош-ҡорт. *Нәҫелдәш бал ҡорттарының үҙ-ара аталаныуына юл ҡуйырға ярамай.*

**НӘҪЕЛЛЕ** *с.* **1.** Ағай-энеһе, туғандары күп булған; нәсәпле.

**2.** Яҡшы тоҡомдан сыҡҡан (үҫемлек, хайуан һәм ҡош-ҡортҡа ҡарата); тоҡомло.

**НӘҪЕЛЛӘШТЕРЕҮ** *к. иҫк.* Үҫемлек, хайуандарҙың бер нәҫелен икенсе нәҫел менән аралаштырыу. *Төрлө тоҡомдо бер-береһе менән нәҫелләштереү арҡаһында малсылыҡ эше .. бик ныҡ алға китте.* Ғ. Ғисмәти.

**НӘҪЕЛ-НӘСӘП** *и. йыйн.* **1.** Бер ата-бабанан сыҡҡан быуын-быуын кешеләр. *Тауҙар ҡуйынына һыйынып ултырған ауылдарҙың кешеләре нәҫел-нәсәбе менән урмансы булған.* Н. Мусин. *[Самат:] Мин Зиннәт мулланың алтындары ҡайҙа күмелгәнен беләм. Ул беҙҙең ғүмергә генә түгел, бөтә нәҫел-нәсәбебеҙгә етәсәк.* Х. Ибраһимов.

**2.** Ағай-эне, туған-тумасалар. *Ул саҡта Рыбаков осратҡан, уға йыр яҙҙырған Әхмәҙи Ғәлиевтарҙың, Валейкаларҙың.. туған-тумасаһы, нәҫел-нәсәбе бәлки әле лә барҙыр.* К. Мәргән. *Большевиктар әйтә: — Нәҫел-нәсәп, түрәлектең бото бер тин, тип.* Ш. Бабич.

**НӘҪЕЛСӘНЛЕК** *и.* Нәҫел үҙенсәлектәрен киләһе быуынға тапшырыу һәләте.

**НӘҪЕЛ-ТОҠОМ** *и. һөйл. кар.* **нәҫел-нәсәп.**

**НӘҪЕЛҺЕҘ** *с.* **1.** Ағай-энеһе, туғандары булмаған; нәсәпһеҙ.

**2.** Күренекһеҙ, ябай нәҫелле; нәсәпһеҙ. *[Боҫтан:] Мин һеҙҙең кеүек нәҫелһеҙ түгел. Атам бына тигән старшина.* Б. Бикбай.

**НӘҪЕЛ-ЫРЫУ** *и. йыйн.* **1.** Бер ата-бабанан сыҡҡан бер ырыу, бер быуын кешеләре. *[Дейеү] Үҙем ошонда бөтә нәҫел-ырыуым менән күсеп киләм — ти икән* (Әкиәттән).

**2.** Ағай-энеләр, туғандар. *[Балалар] ата-әсәһе һәм нәҫел-ырыуҙары менән һаубуллашып .. киттеләр.* Т. Килмөхәмәтов.

**НӘҪЕР** [*ғәр.*] *и.* Лирик йөкмәткеле бәләкәй күләмдәге проза әҫәре. *Нәҫер жанрына заманында Мәжит Ғафури, Афзал Таһиров кеүек яҙыусылар мөрәжәғәт иттеләр.* К. Мәргән.

**НӘҪТӘ** [1] *и. диал.* Нәмә.

**НӘҪТӘ** [2] *а. диал.* Нимә.

**НӘТАҠҠИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Һүҙ, телмәр һөйләүгә оҫта. *Нәтаҡҡи остаздан һабаҡ алмайынса ғалим булмайҙыр.* М. Өмөтбаев.

**НӘТИЖӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Берәй эш-хәлдең аҙағы; һөҙөмтә. *Нәтижә сығарыу. Тейешле нәтижәгә килеү. Дүрт йыл буйы һуғыштыҡ.. Нәтижәһе шул булды: аяҡһыҙ-ҡулһыҙ ҡайттыҡ* (Бәйеттән).

**2.** Бер нисә һанды ҡушҡандан барлыҡҡа килгән дөйөм һан. *Биш һандың нәтижәһе.*

**3.** 3-сө эйәлек һәм у.-в. клш аффиксы менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*кар.* **нәтижәһендә**).

**НӘТИЖӘЛЕ** *с.* Аҙағы яҡшы күрһәткесле; һөҙөмтәле. *Нәтижәле хеҙмәт.*

**НӘТИЖӘЛӘ** *р.* Берәй эш-хәл һөҙөмтәһендә. *Сәғәт 11-гә ҡәҙәр туп, пулемет, мылтыҡ атышы дауам итте. Нәтижәлә .. ҡыҙыл гвардия вокзал яғынан һөжүм яһап, аҡ гвардияны сигенергә мәжбүр итте.* З. Шәрҡи.

**НӘТИЖӘҺЕҘ** *с.* Аҙағы уңышһыҙ; һөҙөмтәһеҙ. *Нәтижәһеҙ эш.*

**НӘТИЖӘҺЕНДӘ** *бәйл. функцияһында* Төп килештәге исем, исем ҡылымдан һуң килеп, эш-хәлдең нимәгәләр бәйле рәүештә, уның һөҙөмтәһе рәүешендә булыуын белдерә; һөҙөмтәһендә. *Ҡоролоҡ нәтижәһендә. Эшкә иғтибарлы булыу нәтижәһендә.*

**НӘҮАДИР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кар.* **надирә.** *[Аҡмулла] ҡаҙаҡ шағирҙары араһында булған мажараларҙы һәм нәүадирҙы хикәйәт итеп, бәғзе ваҡыттарҙа мәжлесте хушландырып та ебәрер ине.* Р. Фәхретдинов.

**НӘҮБӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Эш-хәлдәге эҙмә-эҙлекле тәртип. *Нәүбәт билдәләү. Нәүбәт һаҡлау.* ■ *Береһен-береһе ҡыуып нәүбәт менән тирбәләләр зәңгәр тулҡындар.* М. Харис. / Эштең шул тәртип менән билдәләнгән бер өлөшө. *Метроның беренсе нәүбәте 1935 йылдың 15 майында файҙаланыуға бирелде.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 15 май.

**2.** Эҙмә-эҙлекте һаҡлау маҡсатында бер-бер артлы теҙелгән тәртип; киҙеү. *Нәүбәткә теҙелеү. Нәүбәттә тороу.* / Шул тәртип эсендәге айырым бер кешенең урыны, эште башҡарыу ваҡыты. *Нәүбәт алыу. Нәүбәт етеү.* ■ *Үҙ нәүбәтең булһа, ашханаға сығып.., аш йәки бутҡа бешерергә керешәһең.* М. Ғафури. *Уртаға иблис сыға нәүбәт алып.* Ш. Бабич.

**3.** Дежур тороу эше, дежурлыҡ хеҙмәте. *Пожарниктар нәүбәттә тора. Сөнки йыш ҡына булған пожар шуны талап итә.* Ә. Ихсан.

♦ **Беренсе нәүбәттә** иң элек, иң тәүҙә. **Нәүбәттән тыш** билдәләнгән ваҡыттан алда.

**НӘҮБӘТЛЕ** *с.* Нәүбәт (1 мәғ.) тәртибендә ҡоролған, нәүбәт менән башҡарылған *Нәүбәтле эш.*

**НӘҮБӘТЛӘҮ** *ҡ.* Нәүбәт тәртибен тотоу; сиратлау. *Нәүбәтләп эшләү. Нәүбәтләп ҡарауылда тороу.*

**НӘҮБӘТЛӘШЕҮ** *ҡ.* Бер-бер артлы килеү, бер-береһен алмаштырыу; сиратлашыу. *Нәүбәтләшеп эшләү.* ■ *Йөрәк эшендә эшләү ваҡыты менән тик тороу нәүбәтләш(ә).* З. Заһидуллин.

**НӘҮБӘТСЕ** *и.* Нәүбәт буйынса берәй эш, вазифа башҡарған кеше; дежур. *[Нәүбәтсе] кистән ҡапҡа ҡағып, ишек шаҡып йыйылышҡа әйтеп сыҡты. Нәүбәтсенең артынан уҡ урамда аяҡ тауыштары ишетелә башланы.* Р. Ғабдрахманов.

**НӘҮБӘТТӘГЕ** *с.* **1.** Нәүбәттә торған, нәүбәт буйынса иң яҡындағы; сираттағы. *Нәүбәттәге мәсьәлә. Нәүбәттәге эштәр.*

**2.** Билдәле бер эҙмә-эҙлелек буйынса ҡаралған; сираттағы. *Нәүбәттәге ултырыш. Нәүбәттәге пленум. Сабыш аттарының нәүбәттәге ярышы.*

**НӘҮҒ** *и. ҡар.* **нәүғе.**

**НӘҮҒЕ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Төр. *Яғыу материалының төп нәүғеһе.*

♦ **Бер нәүғе** бер ни тиклем, бер ни ҡәҙәр. *Хәҙерге көндә донъя кәрәк-ярағы бер нәүғе теүәлләнде.* М. Ғафури.

**НӘҮҘӘ** [*фарс.*] *иҫк. кит.* Һауа, атмосфера.

**НӘҮЕМ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Йоҡо. Нәүемгә талыу.

♦ **Нәүем баҙарына [китеү]** йоҡлау ■ *Хәлдән тайған ваҡытта ғына: «Нәүем баҙарына, ятырға!» — тип ҡысҡырып фарман сыға.* М. Ғафури.

**НӘҮКӘР** *и. ҡар.* **нөгәр** 1.

**НӘҮМИҘ** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Өмөтһөҙ, рухһыҙ.

□ **Нәүмиҙ булыу** өмөт юғалтыу, өмөтһөҙләккә ҡалыу. **Нәүмиҙ итеү** өмөттө алыу, өмөтһөҙләндереү.

**НӘҮМИҘЛЕК** *и. иҫк. кит.* Өмөтһөҙлөк. *Хөсәйен ҡарт нәүмиҙлектең сигенә сыҡһа ла, үҙенең баҙарын төшөрә торғандарҙан түгел ине.* В. Исхаҡов.

**НӘҮХӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Илаш-һыҡраш.

□ **Нәүхә ҡылыу** илау. *Керһеҙ йәндәр нәүхә ҡылып, ҡара эстәрҙе ҡарғағандар* (Бәйеттән).

**НӘФАСӘТ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **нәфәсәт.**

**НӘФЕЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Өҫтәмә рәүештә эшләнә торған эш.

**2.** Бүләк.

♦ **Нәфел намаҙы** *ҡар.* **намаҙ. Нәфел ураҙаһы** *ҡар.* **ураҙа.**

**НӘФЕС** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Йән, күңел. *Милләт эшен үҙ эше тип, нәфесене яҡын белеп, хеҙмәтендә теле, малы, ғилеме илә хәҙер улыр.* С. Яҡшығолов.

**2.** *кусм. ҡар.* **нәпсе.**

**НӘФЕС-ШАЙТАН** *и. иҫк.* Тынғы бирмәгән, нәпсене ҡүҫтергән эске тойғо. *Нәфес-шайтан кергәс, инсан донъяһы аҙҙы-туҙҙы, сыҡты сиктән һәммәһе.* Ш. Бабич.

**НӘФИС** [*ғәр.*] *с.* **1.** Күңелгә хуш килерлек; матур. *Нәфисәгә сәләм нәфис ел арҡыры.* Ш. Бабич. *Шундай нәфис, һәйбәт еләҫ көндә .. ифрат күңелле.* М. Фәйзи.

**2.** Тышҡы һыҙаттары бик нескә; зифа, наҙлы. *Йөҙгәндә ҡыҙҙарҙың яңы ғына ҡалҡып килгән нәфис аҡ күкрәктәре күренеп-күренеп ҡала.* З. Биишева. *Их, матур яҙ, һинең нәфис гөлдәр тамыр йәйгән минең күңелгә.* М. Харис.

**3.** Яңғырашы йомшаҡ; яғымлы. *Нәфис тауыш менән уяттылар, тау, урманын, иҙел ярҙарын.* Д. Юлтый.

♦ **Нәфис һүҙ** сәхнә әҫәре рәүешендә тасуири һөйләүҙән ғибәрәт сығыш. **Нәфис фильм** тормошто сәнғәт алымдары нигеҙендә тасуирлап биргән фильм.

**НӘФИСЛЕК** *и.* Матурлыҡ, гүзәллек. *Тәбиғәт күренешенең нәфислеге.* ■ *Үҙенең моңло тауышы менән ул [Ғәптерәшит] беҙҙең күңелебеҙҙе бөтөнләй билэп алды, .. әллә ҡайҙарға, нәфислек донъяһына алып китте.* К. Мәргән.

**НӘФИСЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Нәфислек өҫтәү, нәфис итеү. *Беҙҙең поэзиябыҙҙа .. хистәрҙе нәфисләндереүсе һәм сафландырыусы поэтик ҡаҙаныштарыбыҙ бар.* Ғ. Хөсәйенов.

**НӘФИСЛӘҮ** *ҡ.* Матурлыҡ биреү, матур итеү; матурлау. *Уның [Гүзәлдең] саф мөхәббәт хистәре .. бөтә тәбиғәтен, эшен нәфисләй.* Ғ. Хөсәйенов.

**НӘФРӘТ** [*ғәр.*] *и.* Бик ҡаты асыу, көслө дошманлыҡ тойғоһо. *Нәфрәт менән ҡарау. Нәфрәт белдереү.* ■ *Абдрахмандың һәр тамсы ҡаны аҡ бандиттар өҫтөнә ут булып төшкән. Нәфрәт көсө ана шул дәрәжәгә еткереп ҡыҙҙырған уның ҡанын.* Ә. Вахитов. *Нәфрәт менән дошманға ташланып еңә кеше.* Р. Ниғмәти.

**НӘФРӘТЛЕ** *с.* Нәфрәт белдергән, бик ныҡ асыулы. *Нәфрәтле тойғо. Нәфрәтле ҡараш.*

**НӘФРӘТЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Нәфрәт тойғоһо уятыу. *Фашистар ҡылған вәхшилек уны нәфрәтләндерҙе.*

**НӘФРӘТЛӘНЕҮ** *ҡ.* Нәфрәт тойғоһо кисереү, нәфрәт белдереү. *Һөйәм тиһәм тормош нәфрәт бирә, нәфрәтләнер саҡта һөйҙөрә.* Р. Бикбаев.

**НӘФСЕ** *и. ҡар.* **нәпсе.**

**НӘФСЕХУР** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Нәпсе ҡоло; нәпселе кеше.

**НӘФСИӘТ** [*ғәр.*] *и.* Эске донъя; күңел, рух.

**НӘФӘҠӘ** [*ғәр.*) *и. иҫк.* **1.** Ярҙамға мохтаж кешеләргә бирелә торған аҡса.

**2.** *кар.* **ризыҡ.** *Егет меҫкен китә ай илдәргә, ризыҡ, нәфәҡә эҙгән ерҙәргә* (Халыҡ йырынан).

● *Ҡыҙ баланың нәфәҡәһе дихаяттар ҡулында.* Әйтем.

**НӘФӘР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Төркөм. *Бындағы залим старшина вә түрәләр беҙҙәрҙе бурҙар нәфәренә ссылкаға ебәрерҙәр.* «Батыршаның хаты».

**НӘФӘСӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ҡиммәтле нәмә.

**2.** *кар.* **нәфислек.** *[Шәмсетдин:] Шиғриәт һәм нәфәсәткә һәләтлек юғарынан бирелгән ҡиммәтле гәүһәр таш.* К. Мәргән.

**НӘХЕС** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Бәхетһеҙлек, уңышһыҙлыҡ. *Нәхес көнө — ул халыҡ ышаныуынса айҙың 7—11, 21—25-тәрендә була.*

**НӘХЕҮ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Синтаксис. *Дәрес гәрәпсә нәхеүҙән бара ине.* М. Ғафури.

**НӘХЕҮСӘЛӘҮ** *к. иҫк.* **1.** Грамматик йәһәттән төҙөк, дөрөҫ итеү. *Нәхеүсәләп һөйләү. Нәхеүсәләп яҙыу.*

**2.** Китапсаға тарттырыу; китапсалау. *Уны [Новиковты] бер генә ҡатлы итеп һуҡһаң, ул һине ун ҡатлы итеп, нәхеүсәләп һүгә башлай.* Д. Юлтый.

**НӘҺАНИ** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Йәшерен. *Замана хакиме окшар йыланға, ғәдәүәт эҙләмештәрҙәр нәһаниҙа.* Һ. Салихов.

**НӘҺАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Көндөҙгө ваҡыт, яҡты көн.

**2.** *күсм.* Яҡты донъя. *Был юлда бар нисәмә олуғ шәһәр, Сибирия үҙе һәм тулы нәһар.* М. Ғафури.

**НӘҺЕР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Йылға. *Нәһер Иҙелдә Тура тимәктә [бер тау] мәшһүрҙер. Ул Турахандың һарай урыныдыр.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**НӘҺИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Тыйыулы. *Нәһи эштәр.*

**НӘҺИЛЛӘНЕҮ** *к. диал. кар.* **йонсоу** [1].

**НӘШАН** *и. кар.* **нишан.**

**НӘШЕР** [*ғәр.*] *и.* Матбуғатта баҫтырып таратыу эше.

□ **Нәшер итеү** матбуғатта баҫтырып сығарыу. *Китап нәшер итеү.*

**НӘШИР** [*ғәр.*] *и. кар.* **нашир.**

**НӘШӨКӨР** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Яҡшылыҡты аңламаған, шөкөр итеүҙе белмәгән.

**НӘШРИӘТ** [*ғәр.*] *и.* Китап-журнал баҫып сығарыу эше менән шөғөлләнгән идара. *Китап нәшриәте.* ■ *1922 йылда «Башкнига» нәшриәте ойошторолдо.* Ғ. Рамазанов.

**НӘШӘ** [*ғәр.*] *и.* Һинд киндеренең орлоғонан алына торған иҫерткес матдә; гашиш. *Нәшә тартыу.*

**НЮА́НС** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Берәй нәмәнең асылы, сифаты йәки мәғәнәһенә хас нескәлек. *Дауыт Юлтыйҙың мөхәббәт лирикаһы ла хисапһыҙ бай поэтик тирбәнеүҙәр, төрлө нюанстар менән тулы.* Ғ. Хөсәйенов.

**НЯ́НЯ** [*рус.*] *и.* Балалар баҡсаһында балаларҙы, больницала ауырыуҙарҙы тәрбиә итә торған ҡатын-ҡыҙ.

# О

**О** Башҡорт алфавитының егерменсе хәрәфе.

**ОА́ЗИС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Сүлдәге һыулы, йәшеллекле урын; вәһә. *Һыу сүлдәрҙе сәскә атып ултырған оазистарға әйләндерә.*

**ОБАЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Гөнаһ, бәлә. *«Обалы — әкәгә»,— тип зар иңрәйҙе.* «Буҙйегет».

**ОБЕЛИ́СК** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ослайып барып бөткән ҡырлы бағана рәүешендәге таш һәйкәл. *Тыуған илдең бойондороҡһоҙлоғо өсөн йәндәрен аямай һәләк булған батырҙар хөрмәтенә обелиск ҡуйылды.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 12 ғинуар.

**ОБЕРТО́Н** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. муз.* Төп тауышҡа өҫтәмә (юғарыраҡ) төҫмөр бирә торған эйәрсен тауыш. *Регистр яғынан был эйәрсен тауыштар төп тауышҡа ҡарағанда юғарыраҡ була, шуға обертон тип атала.* Ғ. Сөләймәнов.

**ОБЗО́Р** [*рус.*] *и. кар.* **күҙәтмә.** *Обзор яһау. Обзор биреү.*

**ОБКА́ТКА** [*рус.*] *махс.*: **обкатка яһау** (*йәки* **үткәреү**) яңы яһалған йәки ремонттан үткән машина һәм механизмдарҙы эшләтеп, һынап ҡарау. *Үҙәк мастерской киңәйтелде, .. двигателдәргә обкатка үткәреү өсөн тағы бер стенд ҡуйылды.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 9 декабрь.

**ОБКА́ТКАЛАНЫУ** *к. төш кар.* **обкаткалау.**

**ОБКАТКАЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **обкаткалау.**

**ОБКАТКАЛАУ** *к. шул уҡ* **обкатка яһау** (*йәки* **үткәреү**) (*кар.* **обкатка**). *Тракторҙы обкаткалау.*

**ОБЛА́ВА** [*рус.*] *и.* Берәй урынды тотош ҡамап, эҙәрләнеүселәрҙе тотоу өсөн үткәрелә торған сара. *Һуңғы ваҡытта ҡалала урлау, талау күбәйеп китте. Милиция облава яһап, иллеләп кешене тотто.* И. Насыри.

**ОБЛИГА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Отош йәки процент рәүешендә доход бирә торған ҡиммәтле ҡағыҙ. *Дәүләт займының облигациялары. Облигация буйынса отоу.*

**ОБМО́ТКА** [*рус.*] *и.* **1.** Балтырға урай торған ҡалын киң таҫма. *Обмоткалы ботинка. Обмотка урау.*

**2.** *кар.* **урама.**

**ОБМУНДИРОВА́НИЕ** [*рус.*] *и.* Формалы кейем комплекты. *Ҡыҫҡа ҡаршы беҙҙең землянкаға Юрий Окунев килеп инде. Өҫтөндә — өр-яңы обмундирование.* «Ағиҙел», 1967, № 5.

**ОБО́З** [*рус.*] *и. кар.* **ылау.** *Обоздар фураж һәм аҙыҡ алырға киткән ерҙән ҡайтмаған.* С. Әлибаев.

**ОБОЗСЫ** *и. кар.* **ылаусы.**

**ОБО́Й** [*рус.* обо́и] *и.* Бинаның эске стенаһына йәбештерә торған биҙәкле, киң ҡағыҙ таҫма. *Обой йәбештереү. Шаҡмаҡлы обой.*

**ОБО́ЙЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **обойлау.** *Обойланған стена.*

**ОБО́ЙЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **обойлау.**

**ОБОЙЛАУ** *к.* Обойлы итеү, обой йәбештереү. *Стенаны обойлау.*

**ОБО́ЙМА** [*рус.*] *и.* Мылтыҡ, пистолет патрондарын магазин ҡумтаһына тултырыу өсөн йәтешләп, теҙеп ҡуя торған рамка. *Пистолет обоймаһы.* ■ *Һаҡ, һиҙгер бул, дарың ҡоро булһын, обоймаңа, дуҫым, һал патрон!* Ғ. Әмири. / Шундай бер рамкаға һыйырлыҡ патрон һаны. *Бер обойма патрон.*

**ОБОРО́НА** [*рус.*] *и.* **1.** Кемдең йәки ниҙеңдер дошман һөжүменән һаҡланышы; ҡурғауыл. *Оборона һуғыштары. Ҡала оборонаһы. Оборона тотоу.*

**2.** Ниҙе лә булһа һаҡлау, ҡурғау өсөн кәрәк булған саралар йыйымы. *Оборона промышленносы. Оборона һәләтлеге.* ■ *Ил оборонаһын нығытыу өсөн техника, индустрия кәрәк, яңы ҡорамалдар, яңы машиналар эшләп сығарырға кәрәк.* К. Мәргән.

**3.** Һөжүмдән һаҡланыу өсөн кәрәк булған ҡоролмалар, нығытмалар. *Оборона һыҙығы. Дошман оборонаһын ҡыйратыу.*

**ОБОРОНАЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **обороналау.**

**ОБОРОНАЛАУ** *к.* Дошман һөжүменә ҡаршы тороп, ниҙе лә булһа һаҡлау; ҡурғау. *Беҙҙең командование башҡаланы обороналау менән бергә, яңы көстәр туплап, аяуһыҙ һөжүмгә әҙерләнде.* Д. Исламов.

**ОБОРОНАСЫ** *и.* Оборонасылыҡ политикаһын тотҡан кеше.

**ОБОРОНАСЫЛЫҠ** *и.* Беренсе империалистик һуғыш йылдарында «Ватанды һаҡлау» лозунгы аҫтында буржуаз дәүләтте һәм милли буржуазияны яҡлап, эшселәр синыфы мәнфәғәтен һатҡан оппортунистик партиялар политикаһы.

**О́БРАЗ** [*рус.*] *и.* **1.** Кемдеңдер күҙ алдына баҫтырылған, хыялға килтерелгән төҫө, рәүеше, һүрәте. *Һуғыш батырҙарының онотолмаҫ образы.*

**2.** *әҙ., сәнғ.* Ысынбарлыҡтың конкрет күренеш формаһында бирелгән дөйөмләштерелгән художестволы сағылышы. *Образдар менән фекер итеү.* ■ *Образдар ярҙамында яҙыусы тормошто сағылдыра ...* К. Әхмәтйәнов. / Яҙыусы, актёр, художник тарафынан ижад ителгән тип; шәхес. *Талантлы артист Мәғәфүр Хисмәтуллин сәхнәлә Салауаттың онотолмаҫ образын .. [ижад итте].* «Ағиҙел», 1968, № 5.

**ОБРАЗЛАНДЫРЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **образландырыу.** *«Салауат батыр» тигән ҡобайырҙа Салауат образландырыла.* Ә. Харисов.

**ОБРАЗЛАНДЫРЫУ** *к.* Ниндәй ҙә булһа типты образға әйләндереү. *Йырҙа образландырыу.*

**ОБРАЗЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **образлау.** *Хыялда образланыу.*

**ОБРАЗЛАУ** *к.* Һүрәтләп биреү. *Башҡорттоң яҙма поэзияһы, халыҡ йырҙары кеүек үк, нигеҙҙә реалистик метафораға таянған образлауҙар рәүешендә үҫте.* Ә. Хәкимов.

**ОБРАЗЛЫ** *с.* **1.** Тормошто образдар (2 мәғ.) аша кәүҙәләндергән; образдарға бай булған. *Образлы фекер.*

**2.** Асыҡ, көслө, тере итеп күҙ алдына баҫтырырлыҡ. *Образлы телмәр. Образлы һүҙ.* ■ *Халыҡ араһынан сыҡҡан сәсән, экиәтсе, йырсы, мәҙәкселәр, һис шикһеҙ, үй һәм тойғоларын яҡшы оҫталыҡ менән, образлы... һөйләмдәр менән теҙеп биреү һәләтенә эйә булған.* Ғ. Амантай.

**ОБРАЗЛЫЛЫҠ** *и.* **1.** Образдар менән һүрәтләнеш. *Художестволы әҙәбиәттең уҡыусыларға тәьҫир итеү, уны тәрбиәләү көсө .. образлылыҡҡа ҡайтып ҡала.* Ә. Вәли.

**2.** Телдәге йәнлелек, матурлыҡ, асыҡлыҡ. *Әҙәбиәттең милли үҙенсәлеге ин тәүҙә телдең образлылығында күренә.* К. Мәргән.

**ОБРЕ́З** [*рус.*] *и.* Көбәген ҡырҡып ҡыҫҡартылған мылтыҡ. *Анатолий обрезын тартып сығарҙы ла, оҙон буйлы фетнәсегә төҙәп атты. Теге эсен тотоп ергә тәгәрәне.* Р. Хәкимов.

**ОБРО́К** [*рус.*] *и.* Крепостнойлыҡ ваҡытында крәҫтиәндәрҙән помещиктар алған яһаҡ.

**ОБСЕРВАТО́РИЯ** [*рус.* ⟨ *лат*] *и.* Астрономик йәки геофизик күҙәтмәләр өсөн махсус ҡорамалдар менән йыһазландырылған бина һәм шундай күҙәтеүҙәр алып барған ғилми ойошма. *Пулково обсерваторияһы.*

**ОБСИДИА́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. геол.* Ҡара быяла рәүешендәге вулканик тау тоҡомо.

**ОБСКУРА́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* Обскурантизм яҡлы кеше; реакционер.

**ОБСКУРАНТИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* Мәғрифәткә, культура үҫешенә ҡарата булған дошманлыҡ.

**ОБСТАНО́ВКА** [*рус.*] *и.* **1.** *ҡар.* **йыһаз 1.** *Өй эсе ҡаласа йыйыштырылған, обстановка бик бай күренә.* Д. Юлтый.

**2.** Шарт, хәл. *Бәҙри обстановка хаҡында ҡыҫҡа ғына доклад яһаны.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 22 февраль.

**ОБСТРУ́КЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ниҙелер (парламент ултырышын, йыйылышты һ. б.) шау-шыу ҡуптарыу, кәрәкһеҙ оҙон телмәрҙәр һөйләү йәки башҡа сара ҡулланыу юлы менән юрамал боҙоу ысулы.

**ОБХО́Д** [*рус.*] *и.* **1.** Бер-бер артлы ҡарап, күҙәтеп, тикшереп сығыу ниәте менән яһалған йөрөш. *Больницалағы иртәнге обход. Обход яһау. Обходка йөрөү.*

**2.** *һөйл.* Урмандың бер урман ҡараусыһына беркетелгән өлөшө; объезд. *Атайым[дың] обходы.. Аҡйегет урманынан башлана инде.* Н. Мусин.

**ОБХОДНО́Й** [*рус.*] *и.*, **обходно́й лист** Кемдер эштән бөтөнләй йәки ваҡытлыса киткәндә материаль бирәсәге юҡлығын белдереп төрлө бүлектән тамға ҡуйҙыра торған документ.

**ОБЩИ́НА** [*рус.*] *и. тар.* Ҡорал-ҡорамал һәм идараның тотош йәки өлөшләтә уртаҡлығы менән ҡылыҡһырланған башлыса тәүтормошҡа хас берекмә. *Ырыу общинаһы. Крәҫтиәндәр общинаһы.*

**ОБЩИ́ННИК** [*рус.*] *тар.* Ауыл общинаһы ағзаһы.

**ОБЪЕ́ЗД** [*рус.*] *и. һөйл.* Урмандың бер урман ҡараусыһына беркетелгән өлөшө; обход. *Объездарҙа 13 мең .. гектар урман иҫәпләнә ине.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**ОБЪЁЗДЧИК** [*рус.*] *и.* Урман ҡарауылсыһы. *Беҙ һыртағас кордонында йәшәйбеҙ. Оло кешеләрҙең бөтәһе лә урмансы. Атайым улар араһында объездчик.* Н. Мусин.

**ОБЪЁКТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Кемдеңдер хеҙмәте, иғтибары йүнәлтелгән шәхес, нәмә, күренеш. *Күҙәтеү объекты. Тикшереү объекты.*

**2.** *филос.* Субъектҡа ҡаршы торған, субъекттың практик һәм танып белеү эшмәкәрлеге йүнәлтелгән нәмә.

**3.** Айырым әһәмиәткә эйә булған хужалыҡ, төҙөлөш йәки башҡа нәмә берәмеге. *Промышленность объекты. Төҙөлөш объекты. Хужалыҡ объекты. Хәрби объект.*

**4.** *лингв. ҡар.* **тултырыусы.**

**ОБЪЕКТЙВ** [1] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Оптик приборҙарҙың тикшерелгән йәки фотоға төшөрөлгән нәмәгә йүнәлтелгән линзалы өлөшө. *Фотоаппарат объективы. Микроскоп объективы. Телескоп объективы.*

**ОБЪЕКТИВ** [2] [*рус.* объективный] *с.* **1.** Кеше аңынан тыш, уға бойондороҡһоҙ булған. *Объектив шарттар. Объектив ысынбарлыҡ.* ■ *Социалистик реализм лирикаһында субъектив момент тормош күренештәре, объектив донъя менән тығыҙ бәйләнгән.* Ә. Хәкимов.

**2.** Ғәҙел башҡарылған; дөрөҫ. *Объектив анализ. Объектив баһа. Объектив һөҙөмтә.* ■ *Редакцияға хәбәр яҙғанда, урындағы хәл менән яҡшы танышып, мәсьәләгә объектив рәүештә ҡарап яҙырға кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 17 июль.

**ОБЪЕКТИВИЗМ** [*рус.* ⟨ *англ.*] *и.* Ижтимағи тормош ваҡиғалары һәм хәлдәренә социаль-критик баһа биреүҙән, партия күҙлегенән сығып һығымта яһауҙан ситләшкән нейтраль мөнәсәбәт.

**ОБЪЕКТИВИСТ** [*рус.*] *и.* Объективизм яҡлы кеше.

**ОБЫВАТЕЛЬ** [*рус.*] Үҙ мәнфәғәтен генә күҙәткән тар ҡарашлы ваҡ кеше. *Обывателдәрсә эш итеү.*

**ОВАЛ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Оҙонсараҡ итеп, уратып һыҙылған фигура; оҙонса түңәрәк.

**ОВАЛЬ** [*рус.* овальный] *с.* Оҙонса түңәрәк рәүешендә булған. *Оваль ҡыҫана. Оваль тәҙрә.*

**ОВЧАРКА** [*рус.*] *и.* Ҡарауыллау, эҙәрләү өсөн файҙаланылған эт тоҡомо. *Була тағы овчарка атлы нәни көтөү эттәре. Ялан дарҙа һарыҡ, һыйыр көтөү була эштәре.* Ғ. Амантай.

**ОГНЕМЁТ** [*рус.*] *и.* Ялҡынлы шыйыҡлыҡ һибә торған һуғыш ҡоралы.

**ОҒРО** *и. диал.* Уғры.

**ОДА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. ҡар.* **мәҙхиә.**

**ОДЕКОЛОН** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Хуш еҫле нәмәләрҙең спирт һәм һыуҙағы иретмәһе. *Одеколон һөртөү. Сәскә одеколоны.* ■ *Ул [баш агроном] әле генә ҡырынған булырға тейеш ... одеколон еҫе аңҡып тора.* Ә. Вәли.

**ОДЕЯЛ** [*рус.* одеяло] *и.* Мамыҡһыҙ йоҡа юрған. *Йөн одеял.* ■ *Теҙелеп киткән бер төҫлө карауаттарҙың өҫтө бер төҫлө һоро одеялдар менән ябып ҡуйылған.* Ғ. Дәүләтшин.

**ОҘАЙҒА** *бәйл. ҡар.* **оҙайы.** *Кисә көн оҙайға [Ҡашайҙың] станоғы буш ултырҙы.* М. Тажи.

**ОҘАЙЛЫ** *с.* Оҙаҡ дауам иткән. *Оҙайлы командировка. Оҙайлы сәфәр.* ■ *Ел-дауылдар ҙа, оҙайлы ямғырҙар ҙа йыш ҡына була бында.* Д. Исламов.

**ОҘАЙТТЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **оҙайтыу.**

**ОҘАЙТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **оҙайтыу.**

♦ **Оҙайтылған көн** *ҡар.* **көн** [1].

**ОҘАЙТЫУ** *ҡ.* **1.** Билдәле бер ваҡыт кимәленән арттырыу; оҙағыраҡ итеү. *Ялды оҙайтыу.* ■ *«Фәлән диңгеҙ артында, фәлән утрауҙа,— ти батша,— ғүмер оҙайта торған һыу булыр»* (Әкиәттән).

**2.** Нимәнеңдер дауамын арттырыу; дауамлыраҡҡа әйләндереү; һуҙыу. *Һүҙҙе оҙайтыу. Эште оҙайтыу.* ■ *Вася тағы ла хикәйәһен оҙайта. Ҡала тормошо тулыһы менән Айбулаттың күҙ алдына килмәй.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *ҡар.* **оҙонайтыу** 2. *Маршрутты оҙайтыу. Юлды оҙайтыу.*

**4.** *ҡар.* **оҙонайтыу** 1. *Бауҙы оҙайтыу.*

**ОҘАЙЫ** *бәйл.* Ара һәм ваҡыт төшөнсәһендәге төп килеш һүҙҙәр менән эш-хәлдең дауамын белдерә; буйы. *Йәй оҙайы. Көн оҙайы.* ■ *Тирләпбешеп сәй эсеп, төн оҙайы.. һөйгәшеп, көлөшөп, йырлашып ултырыу өсөн бер нәмәһен дә йәлләмәгән ул [Йәмил ағай].* Т. Сәғитов.

**ОҘАЙЫМ** [1] *с. диал. ҡар.* **оҙам** 2. *Оҙайым йүгерек.*

**ОҘАЙЫМ** [2] *бәйл. ҡар.* **оҙайы.** *Төн оҙайым.* ■ *Иңбашымдан һыпырып ырғытылды ҡыш оҙайым килгән йөктәрем.* С. Кулибай.

**ОҘАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Билдәле бер ваҡыт кимәленән артыу; оҙағыраҡҡа әйләнеү, оҙағыраҡ булыу. *Ғүмер оҙайыу. Көн оҙайыу.*

**2.** Нимәнеңдер дауамы артыу; дауамлыраҡҡа әйләнеү, дауамлыраҡ булыу. *Бәхәс оҙайыу. Һүҙ оҙайыу.*

**3.** *ҡар.* **оҙонайыу** 2. *Юл оҙая.*

**4.** *ҡар.* **оҙонайыу** 1. *Ағас оҙайған.*

● *Ағас ҡырҡһаң, оҙон ҡырҡ: ҡырҡа-ҡырҡа ҡыҫҡарыр; тимер ҡырҡһаң, ҡыҫҡа ҡырҡ: һуға-һуға оҙайыр.* Мәҡәл. *Һөйләһәң, һүҙ оҙайыр, ҡолағың шәмдәй төҙәйер.* Әйтем.

**ОҘАҠ** *с.* **1.** Күп ваҡыт дауам иткән, күп ваҡытҡа һуҙылған; дауамлы. *Оҙаҡ ғүмер. //Оҙаҡ йәшәү. Оҙаҡ көтөү. Оҙаҡ итеп сәй эсеү.* ■ *[Котляр:] Оҙаҡ эш түгел, ҡыҙҙы урлайбыҙ ҙа алып китәбеҙ.* Һ. Дәүләтшина. *Дүрт йыл оҙаҡ булыр һымаҡ ине.* М. Тажи. *[Биктимер:] Әллә оҙағыраҡ йоҡлап киткәнмен инде* (Әкиәттән).

**2.** Ҙур араға һуҙылған; алыҫ, оҙон. *Оҙаҡ юл. // Оҙаҡ һуҙылған кул.* ■ *Әй, матур саҡ! Әлфираҡ! Ҡалдың оҙаҡ.* Ш. Бабич.

♦ **Оҙаҡ ваҡыт** күп ваҡыт буйы. *Айыуғолаҡ, аҫҡа барып төшкәс, оҙаҡ ваҡыт иҫәңгерәп ятҡан, ти* (Әкиәттән). **Оҙаҡ ваҡыт уйлап тормай** күпкә һуҙмай, шунда уҡ. *Тимербулат оҙаҡ уйлап тормай тотҡан да шул тишектән аҫҡа төшөп киткән* (Әкиәттән). **Оҙаҡ та үтмәй** тиҙ ваҡыт эсендә. *Оҙаҡ та үтмәй алты аҡҡош килеп, мамыҡ тундарын һалып, күлгә төшкән* (Әкиәттән).

● *Көткәнгә көн оҙаҡ.* Әйтем.

**ОҘАҠҠА** *р.* Күп ваҡытҡа; күпкә. *Оҙаҡҡа ебәреү. Оҙаҡҡа китеү. Оҙаҡҡа ҡайтыу. Оҙаҡҡа*

*тартылыу. Оҙаҡҡа һуҙылыу.* ■ *Бик оҙаҡҡа китеп барҙы ошо герман һуғышы* (Бәйеттән).

♦ **Оҙаҡҡа ҡалыу** һуңлау; һуңға ҡалыу.

**ОҘАҠЛАМАЙ** *р.* **1.** Бер аҙ ваҡыттан; тиҙҙән. *Гөлнур Нурғәлиевна оҙаҡламай килеп етергә тейеш.* М. Тажи.

**2.** Күп тә тормай; тиҙ арала. *Сөйәлбайҙың әсәһе үлеп киткән. Оҙаҡламай атаһы йәш ҡатын алған* (Әкиәттән).

**ОҘАҠЛАТМАЙ** *р.* Оҙаҡ ваҡытҡа һуҙмай, оҙаҡ тотмай (бер нәмәне эшләү). *Оҙаҡлатмай ғына килеп сығыу.*

**ОҘАҠЛАТЫУ** *к.* Оҙаҡ ваҡытҡа һуҙыу.— *Йә, хәҙер бит эш өҫтө, бында ҡуныл ятып булмай. Нимәһенә оҙаҡлатаһығыҙ.. бер юлы ғына бөтөрөп ҡуя торған эште һуҙаһығыҙ.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**ОҘАҠЛАУ** *к.* Оҙаҡ ваҡыт ҡыланыу, оҙаҡ итеү; оҙаҡҡа һуҙыу. *Ул ике ҡатынының урталығына ултырып, .. оҙаҡлап-оҙаҡлап [сәй] эсте.* Ғ. Дәүләтшин. *[Ҡуҙыйкүрпәс:] Әйҙә ханым, бик оҙаҡланың, һинең килеүеңә тип бешергән ҡош һурпаһы ла һыуый башланы.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». / Оҙаҡҡа ҡалыу, һуңлау. *[Тәнзилә:] Әллә ҡасан килергә ине, мәктәптә эшем бөтмәй, оҙаҡлап киттем.* М. Тажи.

**ОҘАМ** *с.* Алыҫҡа, күпкә һуҙылған; оҙаҡ, оҙон. *Оҙам эш.* ■ *Йәш кенә бер егет иртәнге сәйҙе эсеп, һайыҫҡан-ҡарға ергә төшөү менән, оҙам юлға сығып китте.* Ж. Кейекбаев. // *[Ҡаҙаҡкол:] Яҡшы... Бик оҙамға саба был ат.* Ҡ. Даян.

**2.** Оҙаҡ юлға сыҙаусан, оҙамлы, сыҙамлы (атҡа ҡарата). *Оҙам йүгерек.*

**3.** *диал. ҡар.* **оҙон** 2.

● *Оҙам һуҙҙең ҡыҫҡаһы яҡшы.* Әйтем.

**ОҘАМАЙ** *р. диал.* Оҙаҡламай.

**ОҘАМЛЫ** *с.* Оҙаҡ юлға түҙемле оҙам, сыҙамлы (атҡа ҡарата].— *Эш аты ул, ҡустым, оҙамлы ла талғалы ла була, быны бел!* С. Кулибай.

**ОҘАМСЫЛ** *с. диал.* Оҙамлы.

**ОҘАН** *и.* Ата ҡор.

**ОҘАНҠАШ** *и. шул уҡ* **һабын сәскә** (*ҡар.* **сәскә**).

**ОҘАНЫУ** *к. диал. ҡар.* **оҙайыу** 2. *Күңелдең тәрәндәргә оҙанған тамыры бар.* Ш. Бабич.

**ОҘАҢЛАУ** *к.* Йәмһеҙ тауыш менән оҙон көйгә көйләү. *Йырлайым тип оҙаңлап ултыра.*

**ОҘАРЫУ** *к. диал. ҡар.* **оҙайыу** 1, 2.

**ОҘАТҠЫС** *и. ҡар.* **тырма** [2].

**ОҘАТМА** *и.* Йырлағанға йәки берәй музыка ҡоралы уйнағанға икенсе бер музыка ҡоралының эйәреүе. *Йырҙарҙы баян йәки фортепиано оҙатмаһында башҡарыу тәбиғи нәмәгә әйләнеп китте.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 19 март.

**ОҘАТТЫРЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **оҙатыу** [1]. *Эшкә оҙаттырыу.*

**ОҘАТЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **оҙатыу** [1]. *Һалдатҡа оҙатылыу.*

**ОҘАТЫУ** [1] *к.* **1.** Киткән кешене хушлашып, өйҙән ебәреү. *Оҙатып ҡалыу. Булмәнән оҙатыу.* ■ *Дауытов ашыктырып, уларҙы кабинетынан оҙатты.* Б. Бикбай.

**2.** Киткән кешене, бергә бара биреп, хушлашып ебәреү. *Ҡунаҡты оҙатыу. Оҙатып барыу. Оҙата килеү. Оҙатып ҡуйыу.* / Юл күрһәтеү, һаҡлау, ҡарау йәки хөрмәтләү маҡсаты менән кешене артынан эйәреп бергә йөрөү. *Оҙатып килеү. Илселәрҙе оҙатып йөрөү.*

**3.** Кешене китә торған еренә әҙерләп ебәреү. *Хеҙмәткә оҙатыу. Һалдатҡа оҙатыу. Юлға оҙатыу.* ■ *Мәғфурә уны [Айбулатты] үҙ балаһы кеүек күреп йәлләй, яҙ башы һайын ситкә көтөү эшенә оҙата ине.* Һ. Дәүләтшина. *Беҙҙең дивизияны икенсе фронтҡа оҙаталар, имеш, тигән хәбәр бар.* Д. Юлтый.

**4.** Кешене ҡайҙалыр бер ергә ирекһеҙлек менән ебәреү. *Ҡарауыл менән оҙатыу. Һөргөнгә оҙатыу.* ■ *Булар хан был сапҡынды ҡылған хыянаты өсөн зинданға оҙатырға була* (Әкиәттән).

**5.** *этн.* Ҡыҙҙы кейәү йортона ебәреү. *Ҡыҙ оҙатыу. Оҙатып алыу.* ■ *Ир менән тороп ҡартайған әбейҙәр .. [киленде] һамаҡлап оҙаттылар.* Ш. Шәһәр.

**6.** Һатыр, тапшырыр өсөн ебәреү. *Ағас оҙатыу. Мал оҙатыу. Тауар оҙатыу.* ■ *Колхоздар ҡыҙыл ылау менән иген оҙата башлаған.* М. Тажи.

♦ **[Йәнен] йәһәннәмгә оҙатыу** *ҡар.* **йәһәннәм.** **Ҡаршы ала, оҙатып ҡала** кешенең оло ихтирамы хаҡында һөйләгәндә әйтелә. **Үлемгә оҙатыу** иҫән ҡалыуы икеле булған ергә ебәреү.

● *Кейемгә ҡарап ҡаршы алалар, аҡылға ҡарап оҙаталар.* Әйтем.

**ОҘАТЫУ** [2] *к.* Киндер, тула, шәл һуғырға әҙерләгәндә буйлыҡ епте һуҙыу. *Еп оҙатыу.*

**ОҘАТЫУ** [3] *к. диал.* Оҙайтыу. *Һуҙҙе оҙатыу.* ■ *Етәр инде, Тәүкә, һиңә! Һин шул Хәнәли байҙың һуҙен һөйләйһең. Юҡҡа оҙатмағыҙ!* М. Буранғол.

**ОҘАТЫУСЫ** [1] *и.* Юл күрһәтеү, ҡарау, хөрмәтләү, кешегә йәки берәй нәмәгә ҡарауыл булыу ниәте менән бергә барған йәки йөрөгән кеше.

**ОҘАТЫУСЫ** [2] *и.* Туҡыу эшендә: буйлыҡ әҙерләүсе.

**ОҘАТЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **оҙатыу** [1]. *Ҡунаҡ оҙатышыу.*

**ОҘАУ** *к.* **1.** Билдәле бер ваҡыт кимәленән артыу; оҙайыу. *Көн оҙаны.*

**2.** *диал.* Оҙаҡлау.— *Беҙ ҙә оҙамабыҙ, ҡайта тор, ҡайным.* Н. Мусин.

**3.** *диал. ҡар.* **оҙонайыу** 2. *Юл оҙау.*

**ОҘАҺЫ** *бәйл. ҡар.* **оҙайы.** *[Рәхимә:] Мин әйтәм, ни булды, улай көн оҙаһына кеше йокламай.* К. Кинйәбулатова.

**ОҘОН** *с.* **1.** Буй үлсәме ҙур; киреһе ҡыҫҡа. *Оҙон коридор. Оҙон күлдәк. Оҙон кәртә. Оҙон сәс. Оҙон ҡойроҡ. Оҙон сыбыртҡы. Оҙон таҫма. Оҙон таяҡ.* ■ *Шәүрә килен, кейгән еләнеңдең итәк осҡайынан еңе оҙон* (Халыҡ йырынан). / Бейеклек үлсәме ҙур, бейек (сағыштырмаса нәҙек нәмәләргә ҡарата). *Оҙон бағана. Оҙон мөрйә. Оҙон буйлы.* / Буйға ҙур булған. *Оҙон кәүҙә.* ■ *Ҡолғалай оҙон был тимерсе эйелеп, .. сәхнәгә күтәрелде.* Б. Бикбай.

**2.** Ҙур араға һуҙымлы; алыҫ аралы, алыҫ. *Оҙон юл. Оҙон итеп баҫыу.* ■ *Ул [Буранбай], .. өндәшмәй-нитмәй, оҙон аҙымдар менән бер ыңғайға атлап бара.* Д. Юлтый.

**3.** Баштан аҙаҡҡа дауамы ҙур; күләмле. *Оҙон*

*телмәр. Оҙон итеп яҙыу.* ■ *Һүҙем бөттө, яҙмам инде, бәлки, етер; оҙон булһа, тыңлаусылар ялкып бөтөр.* Б. Бикбай.

**4.** Күп ваҡытҡа һуҙымлы; дауамлы, оҙаҡ. *Оҙон гүмер. Оҙон көн.* // *Оҙон һөйләү. Оҙон яҙыу.* ■ *Оҙон төн буйына яуған ҡар, оҙон төн буйына өргөн буран иртәнсәк тымған.* Ғ. Дәүләтшин.

**5.** *бәйл. мәғ.* Төп килештәге ваҡыт һәм араны аңлатҡан һүҙҙәр менән эйәлек мөнәсәбәтендәге бәйләнешкә инеп, эш-хәлдең дауамын белдерә. *Йәй оҙоно. Ҡыш оҙоно. Көн оҙоно. Төн оҙоно.* ■ *Юл оҙоно ул [юлдашым] үҙенең ауылын, тау йылғаларын йығылып маҡтап барҙы.* Ә. Вахитов.

◆ **Оҙонға ебәреү** (*йәки* **һуҙыу**) 1) бер яҡҡа оҙон итеү; *Өй ыңғайына оҙонға һуҙып һалынған;* 2) оҙаҡҡа һуҙыу. *Эште оҙонға ебәреү.* ■ *[Сәғиҙә] һүҙҙе оҙонға һуҙмаҫҡа, тәрәнгә ебәрмәҫкә тырышты.* М. Тажи. **Оҙон ғүмерле бул(һын)** теләк һүҙе. **Оҙон ҡуллы** *йәки* **ҡулы оҙон** кеше нәмәһенә тейеп барыусан, ҡулсыр. **Оҙон телле** *йәки* **теле оҙон** артыҡ-борторҡ хәбәрҙе күп һөйләй торған.

● *Бауҙың оҙоно һүҙҙең ҡыҫҡаһы яҡшы.* Әйтем. *Көндәшлегә төн оҙон.* Әйтем. *Оҙон тирәктең күләгәһе төбөнә төшмәҫ.* Мәҡәл.

**ОҘОНАЙТТЫРЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **оҙонайтыу.**

**ОҘОНАЙТЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **оҙонайтыу.**

**ОҘОНАЙТЫУ** *к.* **1.** Буй үлсәмен арттырыу; оҙонораҡ итеү. *Күлдәкте оҙонайтыу. Сыбыртҡыны оҙонайтыу.* / Бейеклек үлсәмен арттырыу; оҙонораҡ итеү. *Бағананы оҙонайтыу. Мөрйәне оҙонайтыу.*

**2.** Ара һуҙымын арттырыу; алыҫыраҡ итеү; алыҫайтыу. *Аҙымды оҙонайтыу. Юлды оҙонайтыу.*

**3.** *ҡар.* **оҙайтыу** 2. *Һүҙҙе оҙонайтыу.*

**4.** *ҡар.* **оҙайтыу** 1. *Эш көнөн оҙонайтыу.*

**ОҘОНАЙЫУ** *к.* **1.** Буй үлсәме артыу; оҙонораҡҡа әйләнеү, оҙонораҡ булыу. *Күләгәләр шаҡтай оҙонайған.* С. Агиш. / Бейеклек үлсәме артыу; бейегерәккә әйләнеү, бейегерәк булыу. *Оҙонайып үҫеп китеү.*

**2.** Ара һуҙымы артыу; алыҫыраҡҡа әйләнеү, алыҫыраҡ булыу; алыҫайыу. *Ҡыҫҡа юлдар оҙоная, төн ҡараһы ҡаплаһа* (Халыҡ йырынан).

**3.** *ҡар.* **оҙайыу** 2. *Һүҙ оҙонайҙы.*

**4.** *ҡар.* **оҙайыу** 1. *Көн оҙоная.*

◆ **Тел оҙонайыу** *ҡар.* **тел** 2.

**ОҘОНАЯҠ** *и. зоол.* Кәбеҫтәне ашай торған оҙон аяҡлы ҡороҡҡос бөжәк.

**ОҘОНЛОҠ** *и.* **1.** Берәй нәмәнең бер-береһенән иң алыҫ торған ике нөктә араһы. *Оҙонлоҡ үлсәүе. Оҙонлоҡҡа үлсәү.* ■ *Бейеклеккә һикереүҙә лә, оҙонлоҡҡа һикереүҙә лә Хафиз бөтә чемпиондарҙы уҙып китте.* Ф. Иҫәнғолов. / Берәй нәмәнең ике осо араһындағы алыҫлыҡ. *Каналдың оҙонлоғо. Юлдың оҙонлоғо. Башҡортостандағы иң ҙур йылға Ағиҙелдең оҙонлоғо 1475 километр.*

**2.** Билдәле бер ваҡыттың һуҙымы. *Эш көнөнөң оҙонлоғо. Хикәйәнең оҙонлоғо.*

**3.** Экваторҙың йәки уға параллель булған түңәрәктең урындағы меридиан менән беренсе (төп) меридиан араһындағы дуғаһы (ер өҫтөндәге берәй нөктәнең урынын билдәләү өсөн хеҙмәт итә). *Көнбайыш оҙонлоҡ. Көнсығыш оҙонлоҡ.*

**ОҘОНМОРОН** *и. зоол.* Оҙон томшоҡло ҡороҡҡос ҡуңыҙ.

**ОҘОН-ОҘАҠ** *с.* Бик оҙаҡ. *Оҙон-оҙаҡ көн* // *Оҙон-оҙаҡ һөйләү.* ■ *Мозафар эште оҙон-оҙаҡҡа һуҙмай: «Әсәй, ошонан башлап, Сәкинә килене булa»,— тиғәс, әбейҙең эсе-һушы ҡороно.* Н. Мусин.

◆ **Оҙон-оҙаҡ, яп-яҫы** берәй эште оҙаҡҡа һуҙғанда әйтелә.

**ОҘОН-ОҘАМА** *с. ҡар.* **оҙон-оҙаҡ.** *Көҙгө ҡыҫҡаҡ көндәр, оҙон-оҙама быҫҡаҡ ямғырҙар; ҡуйы томандар менән алмашынып уҙып торалар.* Ғ. Дәүләтшин.

**ОҘОНСА** *с.* Бер яҡҡа оҙонораҡ, оҙонлоҡҡа һуҙымлы. *Оҙонса тәрилкә.* ■ *Ул .. оҙонсараҡ битле бер егеткә ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына мөрәжәғәт итте.* М. Тажи.

**ОҘОНСАЛАНЫУ** *к.* Оҙонсаға әйләнеү, оҙонса булыу. *Кәүҙәһе оҙонсаланған.*

**ОҘОНСАЛАУ** *к.* Оҙонса итеү. *Ҡамырҙы оҙонсалау.*

**ОҘОНТОРОҠ** *с.* Оҙон һынлы (йылҡы малына ҡарата). *Уға [Юлдашҡа] инәһенең һөтөн имә алмай торған был оҙонторо*ҡ *ҡына һылыу ҡолонсаҡтар ҡыҙғаныс була башланы.* З. Биишева.

**ОҘОНТОРОҠЛАНЫУ** *к.* Оҙон һынлыға, оҙон тороҡлоға әйләнеү, оҙон тороҡло булыу. *Клиниканан буйға тағы ла оҙонтороҡлана төшөп, аҡһыл сырайлы, уйсаныраҡ моңло күҙле малайға әйләнеп ҡайтты Рауил.* Б. Бикбай.

**ОҘОН-ҺЫҘА** *р.* Оҙон итеп, һуҙып. *Мөлөк ағай әйләнеп бер ҡараны ла, оҙон-һыҙа баҫып атлауын дауам итте.* Т. Хәйбуллин.

**ОЖМАХ** *и.* **1.** Дини ҡараш буйынса, үлгән гөнаһһыҙ бәндәләрҙең йәне урынлаша торған матур, рәхәт, мул донъя; йәннәт. *Ожмах емеше. Ожмах ниғмәттәре. Ожмах түре. Ожмахҡа инеү.* ■ *Элек халыҡ мохтажлыҡтан йөҙәп, хыял менән ожмах тыуҙырған, рәхәт тормош теге донъяла, тип, михнәт сигеп, ғүмер уҙҙырған.* Ҡ. Даян.

**2.** *күсм.* Матур, рәхәт урын. *Беҙҙә тиңһеҙ сахралар, сахралар — ожмах улар.* Ш. Бабич. *Оҙаҡ ҡарап тора [бер кеше] эсе китеп, ожмах кеүек йорттар эсенә фирештәләр кеүек матурланып, унда йөрөгән һәр бер кешегә.* М. Ғафури.

◆ **Ожмах күлдәге** *ҡар.* **күлдәк** 1. **Ожмахлы булыу** ожмахҡа инеү. *«Ғата ағайың янды ла, был ғазаптарҙан ҡотолдо, туп-тура ожмахлы булды»,— тине әсәйем.* Ғ. Ғүмәр. **Ожмах әһеле** *көлк.* дин кешеләренә ҡарата. *Мисек-ғәмбәр менән мисәтләнгән шешәләр. Шуларҙағы төрлө шараптарҙы ожмах әһелдәре эсәләр.* М. Ғафури. **Урыны ожмахта булһын** *йәки* **урынын ожмах ҡылһын** үлгән кешегә ҡарата әйтелә торған теләк.

**ОЖО** *и. диал.* Ҡотҡо. *Ожо һалыу.*

**ОЗДАНЛАУ** *к.* Тороп сыҙамай, остоҡайланыу. *Озданлап йөрөү. Бынау бала озданлап ҡына тора.*

**ОЗДОЙ** *с.* Сәсрәп торған йылғыр; сая. *Оздой ҡатын.*

♦ **Оздой һарыҡ** оҙон, нәҙек ҡойроҡло һарыҡ. *[Ҡыҙрас:] Ни, Юлдаш, әйҙә йүгерә һалайыҡ! Атыу беҙҙең теге оздой һарыҡ һаҡмар буйына каса ла китә торған.* З. Биишева.

**ОЗЛАТЫУ** *к.* Һуҙып-һуҙып илатыу. *Баланы озлатыу.*

**ОЗЛАУ** *к.* **1.** Нәҙегерәк тауыш менән олоу. *Бүре озлай.*

**2.** *кусм. һөйл.* Һуҙып-һуҙып илау. *Озлап ултырыу.* / Ямаҡ тауыш менән йырлау.

**ОЗЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **озлау.**

**ОЗОКЕРИТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Төҫө балауыҙға оҡшап торған минерал (төрлө май, крем кеүек нәмә эшләү өсөн ҡулланыла); тау балауыҙы. *Озокерит һәм асфальт промышленностың күп тармағында изолятор эшләү өсөн файҙаланыла.* Д. Бураҡаев.

**ОЗОН** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Кислородтың үҙгәреүенән барлыҡҡа килеп, бик көслө тутыҡтырыу һәм зарарһыҙлау сифатына эйә булған газ.

**ОЗОНАТОР** [*рус.* ⟨ *фр.*] Һауаны озонлау өсөн ҡулланылған прибор.

**ОЗОНЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **озонлау.** *Озонланған һыу.*

**ОЗОНЛАУ** *к.* Берәй нәмәнең зарарын йәки насар еҫен бөтөрөү маҡсатында озон менән эшкәртеү. *Һауаны оҙонлау. Һыуҙы озонлау.*

**ОЗОНЛАШТЫРЫУ** *к.* **1.** Озонға әйләндереү.

**2.** Озонға байытыу. *Һауаны озонлаштырыу.*

**ОЗРАЙЫУ** *к. һөйл.* Елдереп ҡасыу. *Озрайып сығып китеү. Малай озрайҙы.*

**ОЙКАШ** *с.* **1.** Тығыҙланып, бер ергә тупланған. *Ойкаш кыуактар. // Ойкаш ултырыу.*

**2.** Бер уй, бер теләк менән берләшкән; ойошҡан. *Ойкаш ауыл.*

**3.** *кусм.* Ниндәй ҙә булһа бер яғы менән бербереһенә яҡын; оҡшаш. *Бабай менән әбей.. улдарына Ҡамыр батыр менән Тамыр батыр тигән ойкаш кына исем кушкан* (Әкиәттән).

**ОЙКАШТЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **ойкаштырыу.**

**ОЙКАШТЫРЫУ** *к.* **1.** Тығыҙлап, бергә беректереү, бергә туплау. *Ойкаштырып ултыртыу.* / Тоташтырып, ялғап бер итеү. *Ситәндән ойкаштырып эшләнгән бәләкәй аҙбарҙан башка йорт тирәһендә кәртә-кура тигән нәмәнең әҫәре лә юк.* Д. Юлтый.

**2.** *кусм.* Бер уй, бер теләк тирәһенә туплап, берләштереү; ойоштороу. *Халыкты ойкаштырыу.*

**ОЙКАШЫУ** *к.* **1.** Тығыҙланып, бергә тупланыу. *Ойкашып ултырыу.*

**2.** *кусм.* Бер уй, бер теләк менән берләшеү; ойошоу. *Ойкашып йәшәү.*

**ОЙКО** *и. иҫк. кит. кар.* **йоко** [1].

**ОЙКО-ТОЙКО: ойко-тойкоһон сығарып эшләү** көс-дәрт менән гөрләтеп эшләү; ойоҡһотоп эшләү. *Ялан яңғыратып уйнап-көлөп, эштең ойко-тойкоһон сығарып эшләп йөрөгән йәштәрҙән Садик, Вахит, Саималарга ололарса хөкөм йөрөтөү төҫө керҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**ОЙОҘОУ: өйәнәк ойоҙоу** баш һыҙлауҙы ырымлау.

**ОЙОҠ** *и.* Еп, йөндән һ. б. бәйләп эшләнгән оҙон ҡуныслы йоҡа аяҡ кейеме. *Ебәк ойоҡ. Еп ойоҡ. Йөн ойоҡ. Ойоҡ бәйләү.* **Ҡуныс ойоҡ** балтырға кейә торған башһыҙ ойоҡ. **Ойоҡҡа баш һабыу** иҫке ҡуныҫҡа яңынан баш бәйләү. *Мин китер вакыт еткәс, Ғәлимә әбей ойокка баш һабып бирҙе.* М. Ғафури. **Ойоҡ энәһе** *кар.* **энә. Тула ойоҡ** ҡата, калуш эсенән кейеү өсөн туланан тегеп яһалған ҡалын ойоҡ. **Баш ойоҡ** *диал.* башалтай.

**ОЙОҠБАШ** *и.* Ҡыҫҡа ҡуныслы ойоҡ; башалтай. *Резина аяк кейемен мөмкин тиклем әҙерәк кейергә кәрәк. Уны тик йөн ойокбаш менән генә кейергә мөмкин.* В. Ғүмәров.

**ОЙОҠ-БЕЙӘЛӘЙ** *и. йыйн.* Ойоҡ һәм бейәләйҙәр. *[Балалар] дәрес әҙерләгәндә [Сәгиҙә апай] йә ойок-бейәләйен бәйләп, йә икенсе бер эш табып, шым ғына ултыра.* Я. Вәлиев.

**ОЙОҠСАН** *р.* Ойоҡ тышынан бер нәмә лә кеймәгән көйө. *Тәнзилә әбей капка асырга сыккан арала, уның артынан яланбаш, ойоксан ғына ул да [Булат та] йүгереп килеп сыкты.* М. Тажи.

**ОЙОҠҺОТОУ** *к.* **1.** Төрлө яҡлап өйөрөлдөрөү (ел, буранға ҡарата). *Ойокһотоп кар яуа, ер менән күк араһы тулкынланып кайнай.* Ҡ. Ибәтуллин.

**2.** *кусм.* Тыныслыҡты алыу; болоҡһотоу. *Күңелде ойокһотоу.*

**3.** *кусм.* Дәртле, етеҙ хәрәкәт менән ниҙер башҡарыу, эшләү. *Бесәнде ойокһотоп сабыу.* ■ *Бына такмак әйтә Хәйерниса, бына хәҙер Әскәбе. Ойокһотоп баҫа тыпыр-тыпыр, көйгә кушыла уның сәскабы.* Т. Йәнәби.

**ОЙОҠҺОУ** [1] *к.* Төрлө яҡлап өйөрөлөү (ел, буранға ҡарата). *Атыш, гауга тына.. Таң яктыра. Инде һим урам. Тик ойокһой һаман карбуран.* С. Кулибай. *Уның [һалдаттың] уткән юлында ойокһоп туҙан ғына кутәрелеп калды.* Н. Иҙелбай.

**ОЙОҠҺОУ** [2] *к. диал.* Ылығыу, эйәләшеү.

**ОЙОМОС** *и.* **1.** Һөттө ойотоу өсөн һалына торған ҡатыҡ; ойотҡо. *Ойомос һалыу.*

**2.** *диал.* Үҙенән-үҙе ойоған ҡатыҡ; сей ҡатыҡ.

**ОЙОМҺОРАУ** *к.* Йоҡомһорау. *Шунда ук һике ситендә ойомһорап ултырган бер катын, ырғып тороп, шәмдең утын калкытты.* Б. Бикбай.

**ОЙОСҠОУ** *к. диал. кар.* **ойоҡһоу** [1].

**ОЙОТКАН** *и.* Йәш, сөсө ҡатыҡ. *Ойоткан ойотоу.* ■ *[Ағаһы] ойоткан эсереп, тамағын да туйҙырып сығармаған* (Әкиәттән).

♦ **Ойоткан тукышыу** ҡыҙ балаларҙың яҙғы тәүге ҡатыҡты сеүәтә йәки бәләкәс кенә көбөсәк менән ҡырға алып сығып, матурлап туҡып, бербереһенә күрһәтешеп, тәмләп ялап, ҡыҙыҡ итеп уйнауы.

**ОЙОТҠО** *и.* **1.** Һөттө ойотоу өсөн һалына торған ҡатыҡ; ойомос. *Ойотко һалыу.*

**2.** *кусм.* Берәй нәмәнең ғәмәлгә килеүенә сәбәпсе булған башланғыс. *Һикһәнбайҙың эсендә яткан кара фекерҙәрҙе берәу ҙә аңлай алманы. Хатта шул фекерҙәренә ойотко һалған Хәлил мәзин дә уны һиҙмәне.* И. Насыри.

**3.** *диал.* Ҡотҡо. *Ул [Ислам] шул көндән башлап һугышка каршы ойотко һалыуҙа күп кенә хеҙмәт итте.* А. Таһиров.

**ОЙОТҠОЛОҠ** *и. диал. кар.* **ойомос** 1.

**ОЙОТҠОС** *и. диал. кар.* **ойомос** 1.

**ОЙОТОУ** [1] *к.* **1.** Ойомос һалып, әсетеү. *Ҡатыҡ ойотоу.* ■ *[Миңлекамал — ҡыҙына:] Иртәнге һауған һөттө сипаратҡа алып барып айырт та, ойотҡан ойот.* Я. Хамматов.

**2.** *күсм.* Ҡуйы хәлгә килтереү, ҡатырыу (ҡанды, аҡһымды).

**ОЙОТОУ** [2] *к.* **1.** Тәнде иҙрәтеп, йоҡоно килтереү. *Ҡымыҙ тәнде ойота.*

**2.** *күсм.* Күңелде иретеп, рәхәтләндереп, бөтә нәмәне онотторроу. *Егеттәрҙе йыйыр көн дә өйөнә, ойотор көлкө вә ялған көйөнә.* М. Өмөтбаев.

**3.** *күсм.* Килешле, йомшаҡ хәрәкәттәр менән бейеү. *Ойота баҫыу.* ■ *Залда Лиданың да ултырғанын уйлап, .. дәрт менән ойотоп бейене ул [Амуров].* Н. Мусин.

**4.** *эйһ. ф. ҡар.* **ойоу** [2]. *Ойотоп алды ла китте.*

**ОЙОТОУ** [3] *к.* Ҡан тибешен һүлпәнләтеп йәки быуып иҫһеҙләндереү. *Хәрәкәтһеҙ ултырыу тәнде ойота.*

**ОЙОТТОРОУ** *к. йөкм. ҡар.* **ойотоу** [1]. *Ҡатыҡ ойоттороу.*

**ОЙОУ** [1] *к.* **1.** Әсеп, һөттән ҡатыҡҡа әүерелеү. *Төн йылы, үҙе аяҙ, ә һауынсылар бойоҡ: ни тиклем һөт иртәнгә ултыра инде ойоп.* «Ағиҙел», 1965, № 7.

**2.** *күсм.* Ҡуйы хәлгә килеү (ҡан, аҡһымға ҡарата). *Тауыҡ йомортҡаһының бешергәндә ойоған аҡһымын яңынан шыйыҡ хәлгә ҡайтарып булмай.*

**ОЙОУ** [2] *к.* **1.** Йоҡоға иҙрәү; йоҡомһорау. *[Кәрим:] Әбүзәр ҡустым, .. йоҡоң килһә, ҡайын төбөндә әҙерәк серем итеп ал. .. Бар, .. ойоп ултыраһың [бит].* Я. Хамматов. / *күсм.* Йоҡомһораған һымаҡ, тыныс, һүрәнке булыу. *Агиҙелкәй йылға ойоп аға, уға саф шишмәләр ҡушыла.* Ғ. Әмири.

**2.** *күсм.* Күңел ирен китеп, рәхәтләнеп, бөтә нәмәне онотоу. *Ҡамыр батырҙың сикһеҙ моңло йырынан бөтә ҡунаҡтар ҡайҙа икәндәрен онотоп, ойоп киткән* (Әкиәттән). / Матур һүҙҙәргә иреп, алданыу; мөкиббән булыу. *[Яппар — муллаға:] Иманға ойоп, һиңә саҙаҡа биреп йөрөгән мин — дүрәк.* Б. Бикбай.

**3.** *күсм.* Килешле, йомшаҡ итеп, йәнде иретерлек итеп бейеү. *Бейегәндә ойоп бейеүйҙәр ҙә, йырлап ебәрәләр кәрәкһә.* Х. Ғиләжев.

**ОЙОУ** [3] *к.* Ҡан тибеше һүлпәнләнгәндән йәки быуылғандан иҫһеҙләнеү. *Тайба әбей .. оҙаҡ ултырып ойоған аяҡтарын көс-хәл менән яҙып, иҙәнгә төштө.* Х. Мохтар. *Беләк иҫһеҙләнде, йөрәк ойоп китте.* Д. Юлтый.

**ОЙОШҠАН** *с.* **1.** Билдәле бер тәртипкә буйһоноп, берләшкән. *Ойошҡан хеҙмәт. Ойошҡан хәрәкәт.*

**2.** Дөйөм маҡсат, дөйөм эш өсөн берләшкән берҙәмлек менән эш иткән. *Ойошҡан эшселәр төркөмө.* ■ *[Гәрәй:] — .. Колхоз — ҡырмыҫҡа иләүе ул, ҡумәк, ойошҡан нәмә.* Б. Бикбай.

**3.** Бер уй менән эшләнгән; берҙәм. *[Сәгди:] Һинә, Юлия Ивановна, нишләргә лә кәрәкмәй. Һин тик беҙгә, беҙҙең ойошҡан кәңәшебеҙгә генә риза бул.* Һ. Дәүләтшина.

**ОЙОШҠАНЛЫҠ** *и.* Дөйөм маҡсат, эш өсөн берҙәм тупланғанлыҡ. *Эш хәҙер тағы ла нығыраҡ ҡайнаны, тағы ла күберәк ойошҡанлыҡ, көс, иғтибар, энергия талап итте.* К. Мәргән.

**ОЙОШМА** *и.* Дөйөм бер маҡсат йәки эш башҡарыу өсөн төҙөлгән берләшмә. *Үҙәк ойошмалар. Төҙөлөш ойошмалары. Сауҙа ойошмалары. Йәмәғәт ойошмалары.* ■ *[Был мәсьәлә] .. район ойошмаларының сара күреүҙәрен һорай.* Б. Бикбай.

**ОЙОШМАУИ** *с.* Ойошмаға мөнәсәбәтле. *Тәүге саралар артелдәрҙең ойошмауи төҙөлөшөн тикшереүгә йүнәлдерелде.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**ОЙОШОУ** *к.* **1.** Бергә ҡушылып йәбешеү, уҡмашыу. *Ойошҡан һалма.* ■ *Тотош сайырға ҡатып ойошҡан .. йөндәрҙе тартып һыҙып, тетә-тетә Емештең кескәй, нәҙек бармаҡтары талып, һыҙлап бөттө.* З. Биишева.

**2.** Берҙәм булып тупланыу. *Ойошоп ятҡан ҙур йортто өрккән ҡуйҙай итер хан* (Ҡобайырҙан).

**3.** Дөйөм эш башҡарыу маҡсаты менән барлыҡҡа килеү, төҙөлөү. *Тау башлап ойошҡанда, колхоздың бер нисә һабаны менән тырмаһынан башҡа бер нәмәһе лә юҡ ине.* М. Тажи.

**4.** Дөйөм уй менән бергәләп эш итеү өсөн берләшеү. *Ойошоп эшләү.* ■ *Бер һүҙ аҫтында ойошҡан биш кеше берҙәм аҙым менән атлай башланыҡ.* Д. Юлтый.

**5.** Ҡуйырып уҡмашыу, төйнәлеү. *Ҡан ойоша.*

**ОЙОШТОРОЛОУ** *к. төш. ҡар.* **ойоштороу** 2—5.

**ОЙОШТОРОУ** *к.* **1.** Бергә аралаштырып, уҡмаштырыу. *Ҡаты һыу сәсте ойоштора. Йөндө ойоштороу.*

**2.** Берәй маҡсатҡа йүнәлтелгән эш өсөн берләштереү. *Балаларҙы түңәрәккә ойоштороу.* ■ *Хәҙер ул турала беҙ көрәш юлын да beләбеҙ. Ул көрәшкә һалдаттарҙы ойоштора ла беләбеҙ.* Д. Юлтый.

**3.** Бер эш башҡарған берәмек итеп төҙөү. *Колхоз ойоштороу. Спорт йәмғиәте ойоштороу. Музей ойоштороу.*

**4.** Берәй эш, сара йәки башҡа нәмәне ғәмәлгә килтереү. *Ярҙам ойоштороу. Йыйыш ойоштороу.* ■ *[Мостафа:] Ҡыҙҙар вечер ҙа ойошторалар бугай, теләгән кеше шунда ҡатнашыр.* Д. Юлтый.

**5.** Берәй эште тейешле тәртип индереп, яйға һалыу. *Эште ойоштороу. Ваҡытыңды дөрөҫ ойоштороу.*

**ОЙОШТОРОУСЫ** *и.* Берәй эште ойоштороп, башлап йөрөүсе. *Халыҡты ойоштороусы.* / Ойоштороу эшенә һәләтле булған кеше. *Яҡшы ойоштороусы.* ■ *[Ферма мөдире] үҙен һәләтле етәксе һәм ойоштороусы итеп күрһәткән.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 28 февраль.

**ОЙОШТОРОШОУ** *к. урт. ҡар.* **ойоштороу** 2—4.

**ОЙОШТОРТОУ** *к. йөкм. ҡар.* **ойоштороу** 2—4.

**ОЙПАЛАНЫУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **ойпалау** 1—3. *Ойпаланған сәс.*

**2.** Йомарланып, бөкләнеп, таушалыу (кейемгә ҡарата); әүһәләнеү. *[Әскәт] ҡырылып, ойпала-*

*ның бөткән пинжәге менән салбарын һыйпаклап көн уҙғара.* Н. Мусин.

**ОЙПАЛАУ** *к.* **1.** Бөрә тотоп шырыштырып, ыуғылау; йомарлау. *Ҡағыҙҙы ойпалау. Ойпалап бөтөрөү.* / Ыуалап, туҙғытыу, болартыу (сәсте). *Кәрим килелеп, сәсен ойпаланы.* Я. Хамматов.

**2.** Ҡәҙерһеҙләп, йомарлап таушалдырыу, әүһәләү (кейемде). *[Көҙрәт] ҡулындағы кәпәсен әүеш-тәүеш килтереп, ойпалап бөттө.* М. Хәйҙәров.

**3.** Көрмәкләп алып, ян-яҡҡа тарткылау. *Айбулат уларҙың [балаларҙың] .. ойпалауынан бер аҙ бушағас, тағы берәмләп иҫәнләште лә берәмләп үбеп сыкты.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** *диал. кар.* әүәләү 2.

**ОЙПАЛАШЫУ** *к.* Үҙ-ара тарткылашыу; көрмәкләшеү.

**ОЙПАЛДЫРЫУ** *к. диал. кар.* **ойпалау** 2.

**ОЙПАЛЫУ** *к. диал. кар.* **ойпаланыу** 2.

**ОЙРА** *и. диал. кар.* **уй** [2].

**ОЙРО́Т** *и. иҫк. кар.* **алтай.**

**ОКЕА́Н** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Ерҙең бөтә материк һәм утрауҙарын уратып алған һыуҙар. *Атлантик океан. Тымыҡ океан. Океан пароходы.* ■ *Ер шарының өстән ике өлөшө һыу менән капланған. Ошо һыу майҙаны Бөтә донъя океанын тәшкил итә.* М. Хисмәтов. *Минең Ватаным Океандарҙан киң, Гүзәллектә ул сәскәләргә тиң.* М. Хәй.

**ОКЕАНА́ВТ** [*рус.*] *и.* Океан тәрәнлектәрен тикшереүсе.

**ОКЕАНО́ГРАФ** [*рус.*] *и.* Һыу мөхитенең физик, химик билдәләрен, океан һәм диңгеҙҙәрҙәге физик, химик процестарҙы, күренештәрҙе өйрәнә торған фән.

**ОКЕАНО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Океанология буйынса белгес.

**ОКЕАНОЛО́ГИЯ** [*рус.*] *и.* Донъя океанындағы физик, химик, геологик, биологик процестар тураһындағы фәндәр йыйылмаһы.

**О́КИСЕЛ** [*рус.*] *и. хим. кар.* **әсемтә.** *Кислота окиселдары. Нигеҙ окиселдары.*

**ОКИСЛАНДЫРЫУ** *к. хим.* Матдәләрҙе кислород менән ҡушылдырыу; әселәндереү.

**ОКИСЛАНДЫРЫУСЫ** *и. хим.* Окисландырырға һәләте булған матдә.

**ОКИСЛАНЫУ** *к. хим.* Кислород менән ҡушылыу; әселәнеү. *Тимер окисланған.*

**О́КИСЬ** [*рус.*] *и. хим. кар.* **әсемә** 1. *Азот окисы.*

**ОККУПА́НТ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Оккупацияла ҡатнашҡан кеше. *Башҡортостандың батыр улдарын фронттарҙа [ғына түгел],.. оккупанттарҙың йәнен алған партизан отрядтарында ла күрергә мөмкин ине.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 9 май.

**ОККУПА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Бер дәүләттең ҡораллы көс ярҙамында башҡа дәүләт ерен баҫып алыуы. *Оккупация гәскәре. Оккупация яһау.*

**ОККУПАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **оккупациялау.**

**ОККУПАЦИЯЛАУ** *к.* Ҡораллы көс ярҙамында башҡа дәүләт ерен баҫып алыу. *Сит илде оккупациялау.*

**ОКЛА́Д** [*рус.*] *и.* Вазифаға ҡарап түләнә торған даими эш хаҡы. *Айлыҡ оклад. Окладты арттырыу.*

**ОКО́П** [*рус.*] *и.* Пулянан, туптан һаҡланыу өсөн, алдына тупраҡ өйөп ҡаҙылған соҡор. *Окоп линияһы.* ■ *Һәр кем үҙе кумелерлек соҡор ҡаҙығас, ятырға тейеш. Ятҡан еренән үҙенең окобын эргәһендәге иптәше менән тоташтырырға тейеш.* А. Таһиров.

**ОКОПТАШ** *и.* Яуҙа бергә булған кеше; яуҙаш. *Яраларым сатнап һыҙлай башлай, окопташтар төшһә иҫемә.* Ш. Биҡҡол.

**ОКРА́ИНА** [*рус.*] *и.* **1.** Ҡаланың ситке өлөшө; биҫтә. *Революция йылдарында эшләнгән эштәрҙең күпселеге эшселәр окраиналарына тура килә.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**2.** Илдең үҙәктән алыҫ булған өлкәһе йәки районы.

**ОКРО́ШКА** [*рус.*] *и.* Кеүәҫкә йәшелсә менән ит турап әҙерләнгән һалҡын аш.

**О́КРУГ** [*рус.*] *и.* Дәүләт территорияһының административ-политик, хужалыҡ, хәрби һ. б. күҙлектән сығып бүленгән бер өлөшө. *Административ округ. Һайлау округы.*

**ОКТА́ВА** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** *муз.* Диатоник гаммалағы әҙмә-әҙлекле тауыштар рәтендәге билдәле бер тауышҡа яңғырашы менән тап килеп, юғарылығы менән айырылған һигеҙенсе баҫҡыс тауыш; диатоник гаммалағы шул ике тауыш араһындағы интервал.

**2.** Бастың бик түбәнге төрө. *Кисә моңһоп йөрөгән егеттәр ҙә октаванан тауыш күтәрә.* Х. Ҡунаҡбай.

**3.** *әҙ.* Беренсе юлы өсөнсө һәм бишенсе юл менән, икенсе юлы дүртенсе һәм алтынсы юл менән, етенсе юлы һигеҙенсе юл менән рифмалашып килгән һигеҙ юллыҡ шиғыр.

**ОКТА́Н** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. хим.* Углерод менән водород атомдары берләшмәһен тәшкил иткән, үҙенсәлекле еҫе булған, төҫһөҙ шыйыҡлыҡ.

**ОКТА́ЭДР** [*рус.* ⟨*гр.*] *и. мат.* Тиң өсмөйөштәрҙән торған һигеҙ ҡырлы есем.

**ОКТЯ́БРЬ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Календарь йылдың унынсы айы. *Көтөүҙе лә октябрҙең ун бишенә тиклем көтөргә һөйләшелгәйне.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** (*баш хәреф менән*) 1917 йылғы Бөйөк социалистик революция һәм уның 7 ноябрҙәге йыллыҡ байрамы (иҫке стиль менән — 25 октябрь). *Октябрь байрамы.* ■ *Октябрь — ул иң ҙур байрам, ер тетрәтеп уҙған көн; бар йыһанға ал таң булып, илкәйебеҙ тыуған көн.* С. Әлибаев.

**ОКТЯБРЯТ** [*рус.* октябрята] *и.* Пионер дружиналары эргәһендә ойошторолоп, пионер ойошмаһына алыу өсөн әҙерләнгән 7—10 йәшлек мәктәп балалары.

**ОКУЛИРО́ВКА** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Ҡырағай үҫемлеккә культуралы үҫемлек бөрөһөнөң ялғаныуы. *Окулировка яһау.*

**ОКУЛИ́СТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Күҙ ауырыуҙары буйынса белгес; күҙ врачы. *Окулист булып эшләү.*

**ОКУЛЯ́Р** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Оптик приборҙың күҙгә ҡуя торған яғындағы линза йәки шулар

системаһынан королған өлөшө. *Перескоп окуляры. Микроскоп окуляры.*

**ОКЛАШЫУ** *к. диал.* Һүҙ куйышыу. *Улар алдан оклашып килгән.*

**ОКОН** *и.* Үҙ ырыуын белмәгән кеше.

**ОКШАТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **окшатыу** 1, 2.

**ОКШАТЫУ** *к.* **1.** Кешенең йәки бер нәмәнең ниндәй ҙә булһа яғына эйәреп, шуға тап килтереү. *Окшатып яҙыу.* ■ *[Захаров] үҙ тауышын үҙгәртеп, офицерҙыкына окшатырға тырыша.* Д. Юлтый.

**2.** Кешенең йәки бер нәмәнең ниндәй ҙә булһа бер яғын башка берәүҙекенә тап килгән тип табыу. *Тайфуровты Сәгиҙә бер карауҙа ук Чапаевка окшатты.* М. Тажи. *Бриллиантка окшаткан ул [Әхмәт] Зөһрә йондоҙон.* Ғ. Сәләм.

**3.** Яҡшы тип кабул итеү, яҡшы күреү; яратыу. *Кылыкты окшатыу.* ■ *Кыҙҙың ... егеткә күҙе төшә. Егет тә уны окшатып куя* (Әкиәттән).

**ОКШАТЫШЫУ** *к. урт. кар.* **окшатыу** 3. *Берберендә окшатышыу.*

**ОКШАУ** *к.* **1.** Кайһылыр яғы менән бер нәмәгә йәки кешегә тартым булыу; окшаш булыу. *[Һылыу:] Был бала кемгә окшап тыуган, тыркыш.* Т. Йәнәби. *Һин окшайһың күлдә йөҙгән аккоштарга.* Ш. Бабич. *[Йомай — Зәлифәгә:] Был тиклем остокай булырһың икән. Кендек инәйеңә окшап, гел елбәҙәкләнеп тороу булмай ул.* Һ. Дәүләтшина. *[Сыртланов:] Уҫал малайга окшайһың һин, мырҙам.* С. Агиш.

**2.** Асығын белеп әйтмәй, фараз итеп әйткәнде белдерә. *Кайтканга окшай. Әйткәнгә окшай.* ■ *[Һыуһылыу — Заятүләккә:] Ана бик күп һыбайлы килә, атаң .. кыуғын ебәргәнгә окшай* (Әкиәттән).

**3.** Яҡшы булып күренеү. *Күңелгә окшау.* ■ *Кейеҙбай үҙенә окшаган бер кып-кыҙыл алманы һайлап ала* (Әкиәттән). *Уның [Күҙыйкүрпәстең] шулай үҙ һүҙле, шук малай булып үҫеүе Кусәр ханга окшамай ине.* «Күҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**4.** Тәртипкә һыйыу, урынлы булыу; килешеү, ярау. *[Сәгиҙә:] Директор кеше менән улай итеп һөйләшеү окшамай ҙа инде.* М. Тажи.

● *Ашай белмәгәнгә аш окшамай.* Әйтем. *Мал эйәһенә окшамаһа, харам булыр.* Әйтем.

**ОКШАУЛЫ** *с. кар.* **окшаш** 1.

**ОКШАШ** *с.* **1.** Кайһылыр бер яғы менән тап килгән; окшаған. *Тимергәле картта ла Һыуһылыу әбейҙекенә окшаш бер хәл бар ине.* Ғ. Дәүләтшин. *Карттың окшаш кына исемле өс улы булған* (Әкиәттән).

**2.** *и. мәг.* Окшашлык. *Тарихи окшашы булмаған вакиға.* ■ *[Батшаның кыҙы] итекселәргә .. донъяла ише лә, окшашы ла булмаған .. бер һыңар ката эшләргә кушып китте, ти* (Әкиәттән).

**ОКШАШЛЫ** *с. кар.* **окшаш** 1.

**ОКШАШЛЫК** *и.* Ниҙеңдер үҙ-ара тап килеше. *Фекер окшашлығы.* ■ *Бер-берееһенә бик яҡын телдәрҙең фонетик төҙөлөшө араһында ла тулы окшашлык булмай.* Ә. Харисов.

**ОКШАШЫУ** *к.* **1.** Ни менән дә булһа үҙ-ара тап килеү, үҙ-ара окшау. *Кан кәрҙәш бит һин дә мин, окшашканбыҙ бигерәк беҙ.* Р. Басимов.

**2.** Бер-берендә яҡын күреү; яратышыу. *[Мәҙинә — Ямалга:] Ниңә .., окшашһығыҙ, гөрләтеп туй яһарбыҙ.* Ф. Мансуров.

**ОЛАҒЫТЫУ** *к.* Ситкә ебәреү; ситкә кыуыу. *Аҙак сиктә Алабай [кәзәне] кыуаларга башланы, кабат килмәҫлек итеп, олагытып ташланы.* Ғ. Амантай.

**ОЛАҒЫУ** (олак*ғ*) *к.* **1.** Ситкә китеү, ситкә табан касыу. *Олагып сыгып китеү.* ■ *Каҙак батырҙары .. атка менә һалып олага.* М. Буранғолов. *[Булат:] Рахмай үҙ йомошо менән минән алдарак олакты.* К. Кинйәбулатова. *Тыуган ерем, һинән олагып мин туйған ерҙәр эҙләп китмәнем.* М. Илбаев.

**2.** Китеп юғалыу, ғәйеп булыу.— *Ниңә ул [Ғабдулла] киткән дә олаккан? Хәбәр ҙә, хәтер ҙә юк.* Д. Исламов.

♦ **Баш олағыу** ситкә китеп, юк булыу. *[Көтөүсе:] Был Алпамыша батырҙың бысагы ине. Хәҙер уның башы олакты, бысагы миңә калды* (Әкиәттән).

**ОЛАҒЫШЫУ** *к. кар.* **олағыу** 2. — *Кайҙарга китеп, олагышып бөттөгөҙ?* Ф. Иҫәнғолов.

**ОЛАЙЫУ** *к. диал.* **1.** Олоғайыу.

**2.** Ҙурайыу.

**ОЛАКТЫРЫУ** *к.* **1.** Кайҙалыр ситкә ебәреү, ситкә касырыу.— *Баштарымды ниндәй сит яктарга олактыраһығыҙ инде, балакайҙарым ...— тип күҙҙәрен һөрттө Зәлифә әбей.* Х. Ғиләжев. /Урынынан алып ырғытыу. *Айыу .. янында яткан камытты .. алып, карагай башына олактырҙы.* С. Кулибай.

**2.** Кире кайтмаҫ ергә ебәреү, ебәреп, юк итеү. *[Ныязгол — Айбулатка:] Минең өс йөҙ бот игенде кайҙа олактырып кайттың?* Һ. Дәүләтшина. /Аҙаштырып калдырыу. *[Әсәйем] .. мин һине олактырам, тип, бесәйҙе .. токка һалды ла, урамга сыгып китте.* Ғ. Минһажев.

♦ **Башты олактырыу** кайҙалыр сығып китеү. **Башын олактырыу** кире кайтмаҫ ергә ебәреү.

**ОЛАРЫУ** *к. диал.* Олоғайыу. *Әле мыйыктары юк йәштәр ҙә бер минутта, гүйә, оларҙы.* Р. Ниғмәти.

**ОЛАТАЙ** *и.* **1.** Атай менән әсәйҙең атаһы. *[Карт:] Был ук-һаҙак менән балта миңә олатайымдан калган* (Әкиәттән).

**2.** *диал.* Атайҙан оло, кан туғанлығы булған ир-ат.

**3.** Ата-әсәнән оло ир-ат. *Хасбулат олатайҙың аңлатмаларын ихлас күңел менән тыңлап ултырам.* З. Биишева.

**4.** *күпл.* Боронғо, үткән быуын кешеләре; ата-баба. *Йөрәгемдең сиртеп моңло сазын, олатайҙар йырын йырлаймын.* Х. Ғәбитов.

**ОЛАУ** [1] *к. диал.* Олоу.

**ОЛАУ** [2] *к. диал.* Аптырау.

**ОЛҒАШЫУ** *к.* **1.** Барып тоташыу, бергә килеп ялғаныу. *Болоттар олгашып китте, ямғыр оҙак яуыр.*

**2.** Алыҫтағы йәки бик бейектәге берәй ергә етеү, барып тоташыу. *Данлы хәбәр ырыу халыктарының теленән төшмәй, беҙ йәйләгән бейек Урал тауҙарына барып олгашты.* «Алдар менән Зөһрә».

**3.** *күсм.* Икенсе бер нәмәгә әүерелеп китеү, әйләнеү. *Тымау ауырыуға олғашты.* ■ *Елбер-елбер елдәр өрә, олғашмаç та микән дауылға* (Халыҡ йырынан).

**ОЛЕА́НДР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Аҡ йәки ал-ҡыҙыл хуш еҫле сәскәле, тал япраҡлы мәңге йәшел йылы яҡ ҡыуағы.

**ОЛЕОГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Һүрәтте майлы буяҡ менән ташҡа баҫа торған иҫке ысул.

**2.** Шул ысул менән баҫылған һүрәт.

**ОЛИГАРХИК** *с.* Олигархияға мөнәсәбәтле. *Олигархик ҡоролош. Олигархик идара.*

**ОЛИГА́РХИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Боронғо грек-латин һәм урта быуат Европа илдәрендә: иң бай, танылы кешеләрҙән торған бәләкәй бер төркөмдөң хакимлеге һәм хакимлек иткән шул төркөм.

**2.** Эре монополистик капиталдың иң йоғонтоло вәкилдәренең политик һәм экономик хакимлеге һәм хакимлек иткән шул төркөм. *Финанс олигархияһы.*

**ОЛИ́МП** [*рус.* ⟨ *гр.*] (*баш хәреф менән*) *и.* Боронғо грек мифологияһында: аллалар йәшәй торған тау.

♦ **Олимп уйыны** дүрт йылда бер үткәрелә торған иң ҙур халыҡ-ара спорт ярыштары.

**ОЛИМПИА́ДА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Дүрт йылда бер үткәрелә торған халыҡ-ара спорт ярышы.

**2.** Фәндең, сәнғәттең һ. б. айырым төрҙәре буйынса үткәрелгән ярыш. *Математиктар олимпиадаһы. Олимпиада үткәреү. Үҙешмәкәр түңәрәктәр олимпиадаһы.*

**ОЛИМПИ́ЕЦ** [*рус.*] *и.* **1.** Боронғо грек мифологияһында: Олимп тауында йәшәгән алла.

**2.** *һөйл.* Олимпиадала ҡатнашҡан кеше. *Беҙҙең олимпиецтар 5 алтын, 5 көмөш һәм 3 бронза миҙал алды.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 20 февраль.

**ОЛҠА** *и.* Йыуан, һимеҙ елкә һәм яурын. *Ғилман бай бөтә олҡаһын һелкетеп лерк-лерк көлөп алды.* И. Көҫәпҡол.

**ОЛО** *с.* **1.** Кем менәндер сағыштырғанда йәш яғынан ҙур; өлкән. *Оло апай. Оло ҡыҙ.* ■ *Минең генә сәсем бәйләнегеҙ утыҙ йәшкә оло ир менән* [Сеңләүҙән]. *Атаһы менән оло ағаһы ни тиклем һөйләшергә тырышып ҡараһа ла, Таҙ үҙенең төшөн һөйләмәгән* (Әкиәттән).

**2.** Оҙаҡ, күп йәшәгән; ҡарт. *Оло кеше. Оло йәшкә етеү.* ■ *[Талипов:] Йәш быуын оло быуындың эшен дауам итә, беҙгә алмашҡа килә.* М. Тажи. *Ул [бала] күҙенә төшкән фуражкаһын күтәреп, оло кешеләр һымаҡ .. яуап бирә.* Д. Юлтый.

**3.** Күләме, дәүмәле ҙур. *Оло балаç. Оло булмә. Оло ҡапҡа. Оло мейес. Оло урам. Оло һандыҡ.* ■ *Был утар төрлө ағас, оло емеш баҡсаһы эсендә тотош йәшеллеккә күмелеп ултыра.* Һ. Дәүләтшина. *Беҙҙең өй алты мөйөшлө, .. бер яғын аш өйө, икенсе яғын оло өй тип йөрөтәбеҙ.* Ш. Насыров. *Оло юл буйлап теҙелгән телефон бағаналары туҡтауһыҙ геүләй.* Ш. Янбаев. / Һан йәһәтенән ҙур, күп һанлы; күмәк. *Оло ғаилә.*

**4.** Әһәмиәте ҙур булған. *Оло байрам. Оло ваҡиға. Оло туй. Оло хеҙмәт.* ■ *Иртәнге оло аш ваҡыты ине. Маянһылыу әллә ниңә бошоман булып ултыра.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». / Тәьҫир көсө, мөһимлеге менән айырылып торған, ҙур. *Оло бәлә. Оло бәхет. Оло шатлыҡ.*

**5.** Тормоштағы урыны, йәмғиәттә дәрәжәһе ҙур. *Оло түрә.* ■ *[Ғариф:] Ул унда, ҡалала, оло урында эшләгән ҙур кешеләр менән осрашмай йөрөмәй торғандыр.* Б. Бикбай. / Халыҡ араһында эше менән танылы; абруйлы. *Йырҙарына улем булмағандай, һис улем юҡ оло йырсыға* Ғ. Рамазанов.

**6.** Бер үк вазифалағы кешеләр араһында юғарыраҡ дәрәжәле. *Буләр хандың оло вәзире Ҡолтубә генә көнө буйы бошоноп, борсолоп йөрөнө, ти* (Әкиәттән).

♦ **Ағай оло, мин ҙур** *ҡар.* **ағай. Оло ауыҙ** кәрәк-кәрәкмәгәнде күп һөйләгән кешегә ҡарата әйтелә. **Кем олоһо, кем кесеһе булыу** урта йәшкә етеү. **Оло башы менән** өлкән кеше килешмәгән бер эш эшләгәндә әйтелә. **Оло башын кесе итеп** өлкән кеше берәй йомош менән килгәндә әйтелә. *Оло башымды кесе итеп үҙем килдем.* **Олоға ебәреү** эш-хәлде ҡуйыртыу, киҫкенләштереү, етдилек биреү. *Эште олоға ебәреү.* ■ *Бөрйәндәр .. ыҙғышты олоға ебәрмәй, шакмандар менән ҡыпсаҡтарҙы килештерергә ятраҡан.* Б. Бикбай. **Олоға китеү** киҫкен төҫ алыу, киҫкенләшеү. *Эш олоға китеп барғанға оҡшай, бөгөн үк һөйләшергә кәрәк был малай менән.* Н. Мусин. **Олоға һан** 1) ир етеп, өлкәндәр иҫәбенә ингән; 2) өлкәндәр иҫәбендә булып та, улар эше ҡулынан килмәгән. **Олоға һанланыу** өлкән кешеләр иҫәбенә инеү, ир етеү. *Тағы бер йылға дәүәйеп, .. олоға һанланып ҡайттым.* Ә. Вахитов. **Оло йөрәкле** киң күңелле, бик кешелекле. **Оло ҡул** оло кешеләр кеүек; ололарса. *Ҡулдәге оло ҡул тегелгән.* **Олоно оло тип белмәй** өлкән кешеләргә кеселеклек күрһәтә белмәгән кешегә әйтелә. **Оло һөйләү** маҡтанып, ниҙелер һанға һуҡмай һөйләү. *[Ғөбәйҙулла:] Был хәйерсе ерҙә йәшәп булмаç инде. [Шәүәли:] Мырҙам, улай оло һөйләмә! Ергә төкөрөп, кире яларға тура килмәһен.* Р. Солтангәрәев. **Оло һүҙ** мәғәнә көсө ҙур булған хәбәр.

● *Йәш оло түгел, аш оло.* Әйтем. *Оло һүҙен тыңламаған оролған да бәрелгән.* Әйтем. *Һағынып барғандың хаҡы оло, саҡырып барғандың аты оло.* Әйтем.

**ОЛОҒАЙТЫЛЫУ** *ҡ. эйһ. ф. ҡар.* **олоғайтыу** 1. *Ваҡыт үтә, олоғайтыла.*

**ОЛОҒАЙТЫУ** *ҡ.* **1.** Олоға әйләндереү, өлкән итеү. *Ҡайғы кешене олоғайта.*

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **олоғайыу.** *Беҙ ҙә егет сакта йөҙә торғайныҡ та хәҙер олоғайтты.* Б. Бикбай.

**3.** Өлкәнгә һанау, өлкән итеү. *Етек һаҡал-мыйығы [Айбулатты] .. байтаҡҡа олоғайтып күрһәтә.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Ҙур һүҙгә барып етеү; ҙурайтыу. *«Ғибаҙулла ағай,— мин әйтәм,— әйҙә икәүләп тейәйек. Ниңә һүҙҙе олоғайтырға».* Н. Мусин.

**ОЛОҒА́ЙЫУ** *ҡ.* **1.** Оло йәшкә етеү; ҡартайыу.— *Был бай .. кәләш әйттерергә уйламай ҙа. Олоғайып бара [бит инде].* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Ололар сырайы инеү, ҡарттар төҫө алыу. *Олоғайып китеү.*

**ОЛОҠ** *и. кит. ҡар.* **олуғ** 1. *[Ҡарамырҙа:] Кем дә кем хурлаһа олоҡтарҙы, башын сабып, доньяһын үртәрмен.* Х. Ғәбитов.

**ОЛО-ҠАРА** *с.* Самаһыҙ ҙур (урынһыҙҙан йәки уйламағандан ҙур булып сыҡҡан нәмәгә ҡарата). *Оло-ҡара бер эш. Оло-ҡара тауыш сығарыу.*

**ОЛОҠЛАУ** *к. диал.* Ололоҡлау. *Олоҡлап ҡаршы алыу.*

**ОЛОҠЛО** *с. диал.* Ололоҡло.

● *Улың булһа, олоҡло менән күрше бул, ҡыҙың булһа, ҡылыҡлы менән күрше бул.* Мәҡәл.

**ОЛОЛАНЫУ** *к. диал.* Олоғайыу.

**ОЛОЛАТЫУ** *к. диал.* Олоғайтыу.

**ОЛОЛАУ** *к.* Олоға, ҙурға һанап хөрмәтләү. *Бер аҙ ваҡыт үткәндән һуң, атайым ҡайтып керҙе. Урынымдан тороп, ҡаршы барып, ололау менән күрештем.* М. Ғафури. *Ололарҙы ололау — яҡшылыҡтың билдәһе, кеселәрҙе кеселәү — кешелектең билдәһе* (Ҡобайырҙан).

**ОЛОЛОҠ** *и.* **1.** Йәш яғынан ҙур булғанлыҡ; өлкәнлек. *Ололого күренеү. Ололого йөҙөнә сыҡҡан.*

**2.** Эш-хеҙмәт йәһәтенән дәрәжәлелек, олпатлыҡ. *Ололоҡ хеҙмәт менән килә.*

**ОЛОЛОҠЛАУ** *к.* Хөрмәт күрһәтеү, ихтирам итеү; ололау. *Сәхипгәрәй .. ҡул биреп мулла менән күреште лә, ололоҡлап, түргә саҡырҙы.* И. Ғиззәтуллин.

**ОЛОЛОҠЛО** *с.* Халыҡ алдында хөрмәтле; абруйлы. *Сал кешеләй, сал ағас та — ололоҡло. Тере тарих кеүек күрәм мин солоҡто.* М. Уразаев.

**ОЛОН** *и.* **1.** Ағастың төп, үҙәк өлөшө; һабаҡ. *[Тумыртҡа] осоп барып, ялан уртаһында торған ҡыу ҡарағай олонона аҫылынды.* Я. Хамматов.

**2.** Төрлө ҡорамалдың өлөштәрен тоташтырып торған үҙәге. *Арба олоно. Һабан олоно.*

**3.** Ҡауырһын ҡуйылмаған уҡ һабағы.

**4.** Оҙоч һөлгөнөң биҙәкһеҙ урта өлөшө.

**5.** *диал. ҡар.* **оңго** [2].

**6.** *диал.* Һурпыс.

**ОЛОС** *и. тар.* Төрки-монгол халыҡтарының йәшәгән билдәле бер урыны.

**ОЛОТОУ** *к. йөкм. ҡар.* **олоу.** *Этте олотоу.*

**ОЛОУ** *к.* **1.** Һуҙып-һуҙып ҡысҡырыу (бүре менән эткә ҡарата). *Сусаҡ таш аҫтында бүреләр олой.* С. Кулибай. / Бүре, эт олоғанға оҡшаш оҙон тауыш сығарыу. *Буран олой.* ■ *[Ел] ҡотоҙона, ауыл өйҙәренең .. мөрйәләренә инеп ыжғыра, олой.* Б. Хәсән. / Көслө тауыш менән туҡтауһыҙ ҡысҡырыу. *Сафин ағай .. урамға, ҡоторонған, олоған халыҡ яғына ташланды.* А. Карнай. / *һөйл.* **Йәмһеҙ** тауыш менән һуҙып йырлау.

**2.** *һөйл.* Һуҙып-һуҙып ҡысҡырып илау; буҙлау. *Олоп илтырыу.*

♦ **Бүреһе олоно** кемдеңдер ҡулына бер төрлө ҙур файҙа төшкәндә әйтелә. **Эстә ас бүре олой** бик ныҡ асыҡҡан ваҡытта әйтелә. *Уға [Ғариф ҡаратҡа] көлкө, ә малайҙарҙың эсендә ас бүре олой.* Б. Бикбай.

**ОЛОШОУ** *к. урт. ҡар.* **олоу** 1.

**ОЛПА** *и. диал.* Олпат.

**ОЛПАҠ** *и.* Дөйә йөнөнән күбеп яһаған бәләкәй түшәк. *Олпаҡ күбеү. Олпаҡ түшәү.*

**ОЛПАЛАУ** *к.* Ашыҡ-бошоҡ, арлы-бирле итеү. *Олпалап эшләү.*

**ОЛПАЛЫ** *с. диал.* Олпатлы.

**ОЛПАТ** *и.* **1.** Күркле, мөһабәт төҫ-киәфәт. *Үҙеңдә олпат менән тотоу. Олпатты юғалтмау.* ■ *Күрәм, үҙ олпатын боҙмай һаҡлап, Урал ята әкрен, тын ғына.* Ш. Бабич. / Кешеләр алдындағы оло исем; хөрмәт. *Олпат ҡаҙаныу.* ■ *Батырҙар ҡала юғалып, олпатын күтәргән шан бөтһә* (Халыҡ йырынан).

**2.** *с. мәғ.* Күркле, мөһабәт төҫкә йәки һынға эйә; олпатлы. *Олпат төҫ. // Олпат атлау.* ■ *Аҡ сәсле олпат кеше .. һүҙен бөтөрҙө.* Ә. Вахитов. *Беҙҙең янға олпат ҡына атлап, урта йәштәрҙәге кеше килеп баҫты.* К. Мәргән.

**ОЛПАТЛАНЫУ** *к.* Мөһабәт төҫ-киәфәт алыу. *Миңнейәр .. ҡалын кәүҙәле урта йәштәргә еткән кеше, ул элеккегә ҡарағанда ла олпатлана төшкән.* Ғ. Вәлиев.

**ОЛПАТЛАУ** *к.* Олпатлы итеү. *Малайҙар [Арыҫланбәк кеүек] олпатлап атларға, тәмәкене ауыҙҙа уныңса тоторға, хатта уныңса башты текә генә тотоп төкөрөргә тырыша.* Р. Низамов.

**ОЛПАТЛЫ** *с.* Оло, ҙур кешегә хас һын, һынпатлы; мөһабәт. *Олпатлы кеше. Олпатлы булыу.* ■ *Шаҡманов шаҡман араһының иң һуңғы олпатлы бай[ы ине].* Б. Бикбай.

**ОЛПАТЛЫҠ** *и.* Мөһабәт төҫ-киәфәт; мөһабәтлек. *Сәхипгәрәй тамам ярһыны. Олпатлығын онотоп, Юлайҙы ҡыуырға кереште.* И. Ғиззәтуллин.

**ОЛТАН** *и.* **1.** Аяҡ кейеменең табанына аҫтан өҫтәп һалынған өлөшө. *Олтан һалыу.* ■ *Борон-борон бер заманда олтан һалдылар табанға.* Х. Ғиләжев. *Аяғына кейгән итегенең, тимен, һай түрәкәйгенәһе, ике ҡатлы икән олтаны* (Халыҡ йырынан).

**2.** *диал.* Олтораҡ.

♦ **Олтан булыу** хеҙмәтсе, ҡол булыу.

● *Сит илдә солтан булғанса, үҙ илеңдә олтан бул.* Мәҡәл.

**ОЛТАРЫУ** *к.* Тыштан тегеп, йөйөн эскә әйләндереү (аяҡ кейеменең).

**ОЛТОРАҠ** *и.* Йылы, йомшаҡ булһын өсөн аяҡ кейеменең табанына эстән һалынған нәмә. *Кейеҙ олтораҡ. Һалам олтораҡ.*

♦ **Олтораҡ булыу** хеҙмәтсе, ҡол булыу.

● *Ҡуҡтән кейеҙ яуһа ла, ҡолға олтораҡ теймәҫ.* Әйтем.

**ОЛУҒ** *и. кит.* **1.** Йәше менән оло; өлкән. *[Бала] юлда олуғ вә кесеккә сәләм биреп, иҫәнлек һорап үткәй.* М. Өмөтбаев.

**2.** Дәүмәле, күләме ҙур. *Был юлда бер нисәмә олуғ шәһәр.* М. Ғафури.

**3.** Ҙур дәрәжәгә, шөһрәткә эйә; бөйөк. *Олуғ батша. Олуғ ғалим.* ■ *Был илдең [Ҡытайҙың] шаһы олуғ бер хан булған.* М. Харис. *[Ҡарт:] Мин олуғ Болғар батшалығынан булам.* «Алдар менән Зөһрә».

**ОМ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Электрҙың ҡаршылығын үлсәү берәмеге.

**ОМАҠ: омаҡ атыу** *диал.* тәкмәс атыу (*ҡар.* **тәкмәс**).

**ОМАР-ЙОМАР: омар-йомар итеү** ашыҡ-бошоҡ эшләү. *Уракты омар-йомар итеп ҡуйыу.*

**ОМБОЛ** *и. диал.* Сөмөкәй.

**ОМЛЁТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Он ҡушып, һөткә туҡып ҡурған йомортҡа тәбейәһе.

**ОММЕ́ТР** [*рус.*] *и.* Электрҙың ҡаршылыҡ кимәлен үлсәй торған прибор.

**ОМО́ГРАФ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Яҙылышы тап килеп, әйтелеше һәм мәғәнәһе тап килмәгән һүҙ (мәҫ. **ба́рлыҡ — барлы́ҡ**).

**ОМО́НИМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Әйтелеше тап килеп, мәғәнәһе тап килмәгән һүҙ (мәҫ. **аяҡ** — атлап йөрөй торған ағза, **аяҡ** — һауыт).

**ОМОНИ́МИКА** [*рус.*] *и.* **1.** *лингв.* Берәй телдәге омонимдар йыйылмаһы.

**2.** Лексикологияның омонимдарҙы өйрәнә торған бүлеге.

**ОМОНИМИ́Я** [*рус.*] *и. лингв.* Төрлө мәғәнәләге һүҙҙәрҙең әйтелеш яғынан тап килеше.

**ОМОФО́РМА** [*рус.*] *и.* Оҡшаш булмаған грамматик формаларҙа әйтелеше менән яҙылышы тап килеп, мәғәнә яғынан айырылған һүҙ (мәҫ. **аҡлан** — исем, төп килеш, берлек формаһы, **аҡлан** — ҡылым, бойороҡ формаһы).

**ОМПАЙТЫУ** *к. диал.* Һемәйтеү.

**ОН** *и.* **1.** Тартып, ныҡ ваҡланған ашлыҡ. *Аҡ он. Арыш оно. Бойҙай оно. Тары оно. Он иләү. Он тартыу.* ■ *[Бабай] өс килененә лә берәр батман он биргән дә икмәк бешереп килтерергә ҡушҡан* (Әкиәттән).

**2.** Бик ваҡ хәлгә килтерелгән төрлө нәмә; онтаҡ. *Хужалыҡта витаминлы үлән оно етештереү башланды.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 12 июль.

◆ **Он эреһе** *диал. кар.* **көрпә** [1].

● *Тел менән тирмән тарттырып, онло булып булмай.* Мәҡәл.

**ОНАНИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Енси теләктең тәбиғи булмаған юл менән ҡәнәғәтләндерелеше.

**ОНДА́ТРА** [*рус.*] *и.* **1.** Көрән төҫтәге аҫыл тиреле, кимереүсе ер-һыу йәнлеге.

**2.** *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Ондатра бүрек. Ондатра яға.*

**ОНКО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Онкология буйынса белгес, врач.

**ОНКОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Медицинаның шешектәрҙе һәм уны дауалау юлдарын өйрәнә торған бүлеге. *Онкология диспансеры. Онкология институты.*

**ОНЛАНЫУ** [1] *к. төш. кар.* **онлау** [1]. *Онланған кейем.*

**ОНЛАНЫУ** [2] *к. төш. кар.* **онлау** [2]. *Онланған тары.*

**ОНЛАТА** *р.* Он менән, он көйөнсә. *Онлата биреү. Онлата түләү.* ■ *[Барый:] Яҙҙыңмы? Яҙ. Колхозсыларға бойҙайҙы онлата өлөшергә.* И. Абдуллин.

**ОНЛАУ** [1] *к.* Онға әүәләү, онға буяу. *Балыҡты онлап ҡурыу. Котлетты онлау.*

**ОНЛАУ** [2] *к.* Төйөп, он итеү. *Гөлбаҙыян .. байрамдарҙа тары онлап, ҡупереп торған тары ҡоймаҡтары бешерер ине.* Ғ. Шәрипов.

**ОНОМА́СТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тел ғилеменең яңғыҙлыҡ исемдәрҙе өйрәнә торған бүлеге.

**ОНОТОЛҒОҺОҘ** *с. кар.* **онотолмаҫ.**

**ОНОТОЛМАҪ** *с.* Хәтерҙә ныҡ һаҡланырлыҡ булған; онотолғоһоҙ. *Онотолмаҫ дуҫ. Онотолмаҫ һүҙ.*

**ОНОТОЛМАҪЛЫҠ** *с.* Хәтерҙә ныҡ һаҙланырлыҡ. *Онотолмаҫлыҡ яҡшылыҡ.*

**ОНОТОЛОУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **онотоу.**

**2.** Үҙ-үҙеңде онотоу. *Шакир донъяның матурлығына, ниндәйҙер мөһабәт ололоғона һоҡланып, һәр өнгә, һәр хәрәкәткә ҡолаҡ һалып, онотолоп киткән.* Ә. Вахитов.

**3.** *эйһ. ф. кар.* **онотоу.** *Күп нәмәне онотолған.*

● *Юлаусының йомошо йүрмә ашағас онотола.* Әйтем.

**ОНОТОУ** *к.* **1.** Иҫтән, хәтерҙән сығарыу. *Белгәнде онотоу. Һабаҡты онотоу. Онотоп ҡалдырыу.* ■ *Улар [Һөнәрсе менән Өйрәнсек] үҙҙәре лә мулла ҡушҡан исемдәрен онотҡан.* З. Биишева. *[Гөлбоҫтан — иренә:] Сәй-шәкәр алырға онотма, йәме.* Ғ. Дәүләтшин. / Күңелдән, иҫәптән сығарыу. *Антты онотоу. Вәғәҙәне онотоу.* ■ *Ҡара сәсем ағарһа ла, онотмамын илемде* (Халыҡ йырынан).

**2.** *һөйл.* Күнекмәне, тәжрибәне юғалтыу. *Гармун уйнауҙы онотоу.*

◆ **Донъяны онотоу** *кар.* **донъя. Онотҡанда бер** бик һирәк. *Онотҡанда бер килеү. Йыйылыш онотҡанда бер уҙғарыла.* **Үҙ-үҙеңде онотоу** бер нәмәгә ныҡ әүрәп, башҡа бөтә нәмәне иҫтән, иғтибарҙан сығарыу. *Үҙ-үҙем(де) онотоп, таҡ шып-һикереп, сығып киттем шашып.* Ш. Бабич.

● *Һуғышка барған, суҡмарын онотҡан.* Әйтем.

**ОНОТСАҠ** *с.* Еңел, тиҙ онотоусан. *[Юлдаш эбей:] Әубәкер ҡарт мәрхүмдең улы Әскәр .. бөтә заводҡа башлыҡ, ти, әллә нимә тигән исеме лә бар ине, хәтеремдән сығып киткән, мин бик онотсаҡмын бит.* Һ. Дәүләтшина.

**ОНОТТОРОУ** *к. йөкм. кар.* **онотоу.** *Һыуһағанда оноттторҙон һыу барлығын.* М. Кәрим.

**ОНСО** *и.* Он менән һатыу иткән кеше. *[Кәрим — Вафаға:] Һин хәҙер онсо Фәхригә бар. Ваҡиғаны бәйнә-бәйнә һөйләп бир.* Х. Ибраһимов.

**ОНТАҒЫС** *и.* Ниҙе лә булһа ваҡлай, онтай торған машина. *Кукуруз онтағыс. Таш онтағыс.*

**ОНТАҠ** [1] *и.* Ҡыҙҙырып төйөлгән тары ярмаһының оно (шул көйө ашала).

**ОНТАҠ** [2] *и.* **1.** Он һымаҡ итеп, ныҡ ваҡланған нәмә. *Гипс онтағы. Күмер онтағы. Фосфор онтағы. Ылыҫ онтағы. // Онтаҡ сода. Онтаҡ тоҙ.* ■ *[Иштуган — уҡыусыларға:] Теш таҙарта торған бер онтаҡ була.* З. Биишева.

**2.** Ниҙең дә булһа һуҡҡанда, турағанда, ыуғанда барлыҡҡа килгән вағы. *Мин селтәрле ҡашыҡ менән мәкенең боҙ онтағын һирпеп түгергә керештем.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** *диал.* Валсыҡ.

◆ **Быҫҡы онтағы** *диал.* быҫҡы табы.

**ОНТАҠЛАНЫУ** *к.* **1.** Онтаҡ [2] хәленә килеү. *Күмер онтаҡланған.*

**2.** Ваҡ-ваҡ киҫәктәргә ватылыу; ваҡланыу. *Ҡоро ҡарағайҙы йығып ебәргәйнем, ботаҡтары онтаҡланып бөттө.* М. Тажи.

**ОНТАҠЛАУ** *к.* **1.** Онтаҡ [2] хәленә килтереү. *Тоҙҙо онтаҡлау.*

**2.** Ваҡ-ваҡ киҫәктәргә ватыу; онтау. *Ташты онтаҡлау. / күсм.* Ҡыйратыу, емереү. *Полк бара фашистарҙы турап, ныҙытмаһын ватып, онтаҡлап.* Я. Ҡолмой.

**ОН-ТАЛКАН** *и. йыйн.* Төйөлгән, тартылған ашлыҡ; он һәм талҡан.

♦ **Он-талкан булыу** 1) бик ныҡ ваҡланыу; 2) *күсм.* ныҡ ҡыйралыу, емерелеү. **Он-талкан итеү** ныҡ ҡыйратыу, емереү. *Аҡ-күк атын батыр йүгәнләй, яуға китер мәле еткәндә. Дошмандары уны күрә алмай он-талкан да ғына иткәнгә* (Халыҡ йырынан).

**ОНТАЛЫУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **онтау** 1, 2. *Беҙҙең сикте тапап үтер өсөн баҫып килгән дошман онталды.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Ныҡ һуғылған, бәрелгәндән ваҡ киҫәктәргә ярғысланыу; ыуалыу. *Тәҙрә быялалары онталып осто.* Ҡ. Ибәтуллин. *Ҡарат сабып киткәндә ҡая таштар онталып, еленән ағас йығылған.* «Ҡараһаҡал».

**3.** *күсм. диал.* Ҡаҡшау, ватылыу. *[Мотал:] Ниңә башҡа колхоздар өсөн шул тиклем онталырға? Беҙгә былай ҙа эш етерлек.* М. Хәйҙәров.

**ОНТАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **онтау.**

**ОНТАУ** *к.* **1.** Онтаҡ хәленә килтереү; онтаҡлау. *Тоҙ онтау.* / *диал.* Он итеп тартыу. *Бисәнең йәшерәге күл тирмәне менән бойҙай онтай.* А. Таһиров.

**2.** Ҡаты нәмәне ваҡ итеп ярғыслау; ватыу. *Таш онтау.* ■ *[Егет] кәйлә менән туң ер киҫәк тәрен туҙҙырып онта[й].* Н. Иҙелбай. *Ә мин тәҙрәмде онтай төртөп, шыр урманға табан йүгерҙем.* Б. Вәлит. / *күсм.* Ҡыйратыу, емереү. *Фашистарҙың донъяһын, онтай һуктыҡ мөрйәһен.* Ф. Дәүләтшин.

**3.** *һөйл.* Ныҡ һуғыу; ҡыйратҡансы тондороу. *[Ғәйзулла — Заһитка:] Нишәп илайһың?.. Әллә малайҙар бештеме? Әйт, томшоғон онтайым!* Я. Хамматов.

**ОҢҒО** [1] *и.* Ҡорал-ҡорамалдың һап кейҙерә торған тишек урыны. *Балта оңғоһо. Ҡасау оңғоһо. Һәнәк оңғоһо.*

**ОҢҒО** [2] *и.* Ҡашмау ҡойроғо.

**ОҢҒОЛ-СОҢҒОЛ** *с.* Бер ере соҡор, икенсе ере ҡалҡыу; соҡорло-саҡырлы, оңғорло-соңғорло. *Был донъяның ние бар?.. Оңғол-соңғол булһа ла йәйләй торған ере бар.* М. Буранғолов.

**ОҢҒОРЛО-СОҢҒОРЛО** *с.* Бер ере ҡалҡыу, бер ере соҡорло; оңғол-соңғол. *Оңғорло-соңғорло һөйәк.* ■ *Оңғорло-соңғорло юл таҫмаһынан башҡа [Ғәмбәровтың] күҙенә бер ни салғылманы.* Ш. Янбаев.

**ОҢҒОР-СОҢҒОР** *с. ҡар.* **оңғорло-соңғорло.** *[Урал:] Тигеҙ ятҡан ер йөҙөн оңғор-соңғор итterҙең.* Урал батыр».

**ОҢҠОЛДАТЫУ** *к.* Оңҡ-оңҡ иттереү. *Оңҡолдатып йотоу.* ■ *[Ғилаж] туҫтаҡтағы балды оңҡолдатып, түңкәргәнсә эсте.* Ж. Кейекбаев.

**ОҢҠОЛДАУ** *к.* Оңҡ-оңҡ итеү. *Оңҡолдап тороу.*

**ОҢҠ-ОҢҠ** *окш.* Шыйыҡ нәмәне алҡынып йотҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Оңҡ-оңҡ итеү.*

**ОҢҠОРТ** *с. диал. ҡар.* **оңҡот** [1] 2.

**ОҢҠОТ** [1] *с.* **1.** Ашап-ашап та туя белмәгән мәскәй (кешегә ҡарата). *Бер ҡатындың .. оңҡот бесәйе булған. Ул бесәй тәмле-татлы ашарға ғына яратҡан* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Оло нәпселе; ҡомһоҙ. *Оңҡот завод хужалары [эшсе халыҡтың] асыуын ҡабарта ине.* Һ. Дәүләтшина.

**ОҢҠОТ** [2] *с.* Уй-фекер йөрөтөүгә булдыҡһыҙ, уҡыуға һәләтһеҙ; ноҡот, аңра. *[Аллаҡаев:] Әҙмәүерҙәй бер малай. Унынсыны бөттө лә, институтка дөмбөрө батманы.. Ҡыҫҡаһы, оңҡот булып сыҡты.* С. Кулибай.

**ОҢҠОТЛАНЫУ** [1] *к.* **1.** Туймаҫ тамаҡҡа, оңҡотҡа [1] әйләнеү; мәскәй булыу. *Оңҡотланып китеү. Оңҡотланып ялтырыу.*

**2.** *күсм.* Ҡомһоҙға әйләнеү, ҡомһоҙланыу.

**ОҢҠОТЛАНЫУ** [2] *к.* Уй-фекер йөрөтөүгә булдыҡһыҙланыу; аңраланыу.

**ОҢОУ** *к. диал.* Үҙ-үҙеңде онотоу; мөкиббән китеү. *Оңоп һөйләшеү.*

**ОПАЛАЙ** *с. диал.* Алабарман. *Опалай кеше. Опалай булыу.*

**ОПАЛУБКА** [*рус.*] *и.* Бетон, тимер-бетон ҡойоу өсөн таҡтанан йәки металдан яһалған ҡалып. *Опалубка яһау.*

**ОПЕКА** [*рус.*] *и.* **1.** Бәлиғ булмағандарҙы, аҡылға теүәл булмаған кешеләрҙе һәм уларҙың мөлкәтен ҡарау, шулай уҡ дәүләт тарафынан кемгәлер тапшырылған йөкләмә. *Опекаға алыу.*

**2.** Шул йөкләмәне алған ойошма йәки кешеләр.

♦ **Халыҡ-ара опека** Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының йөкмәтеүе буйынса һәм күҙәтеүе аҫтында үҙ аллығы булмаған өлкәләргә ҡарата ғәмәлләштерелгән идара.

**ОПЕКУН** [*рус.*] *и.* Кемделер опекаға (1 мәғ.) алған кеше. *Опекун булыу.*

**ОПЕКУНЛЫҠ** *и.* Опекун булыу вазифаһы. *Опекунлыҡты тапшырыу. Опекунлыҡ хоҡуғы.*

□ **Опекунлыҡ итеү** опекун булыу, опекун бурыстарын башҡарыу.

**ОПЕРА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Инструменталь һәм вокаль музыканы берләштереп, театрҙа башҡарыу өсөн тәғәйенләнгән музыкаль драма әҫәре. *«Салауат Юлаев» операһы.* / Шул әҫәрҙең театрҙа башҡарылышы һәм шул театр. *Опера тыңлау. Опера сәхнәһе.* ■ *Операла йәш солистка күрһәтә бөгөн үҙен.* Р. Ниғмәти.

**ОПЕРАТИВ** [*рус.* оперативный] *с.* **1.** Хәрби операцияға мөнәсәбәтле. *Оператив сводка. Оператив план.*

**2.** Эште туранан-тура, практик рәүештә тормошҡа ашыра торған. *Оператив органдар. Оператив бүлек.*

**3.** Эште үҙ ваҡытында юлға һалып ебәреүгә һәләтле. *Оператив эш.*

**ОПЕРАТИВКА** [*рус.*] *и. һөйл.* Кисектергеһеҙ мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн йыйылған ҡыҫҡа йыйылыш. *Оперативка үткәреү. Оперативкала ҡатнашыу.*

**ОПЕРАТИВЛЫҠ** *и.* Эште тиҙ, ваҡытында хәл итеү һәләтлеге; өлгөрлөк. *Эштәге оперативлыҡ. Етәксенең оперативлығы.* ■ *Прокуратура эшендә оперативлыҡ, инициатива — мөһим сифат.* «Ағиҙел», 1966, № 6.

**ОПЕРАТИВНИК** [*рус.*] *и. һөйл.* Оператив (2 мәғ.) органдарҙа эшләгән кеше. *Ейәйәтселәр күмәк булып сыға. Ике оперативник менән унла-*

*ган хулиган араһында алыш башлана.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 23 ғинуар.

**ОПЕРА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ҡатмарлы механизмдарҙы ҡарап эшләткән һәм эштең үтәлеше өсөн яуап биргән юғары квалификациялы эшсе. *Өлкән оператор. Технологик установка операторы.* / Транспорттың йөрөшө тураһында диспетчер менән мәғлүмәт бирешеп торған вазифалы кеше.

**2.** *ҡар.* **кинооператор.**

**ОПЕРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Ауырыу йәки яралы кешегә хирургик юл менән күрһәтелгән ярҙам. *Ҡатмарлы операция. Һуҡыр эсәккә операция. Операция өҫтәле. Операция яһау. Операцияны еңел үткәреү.* ■ *Яңынан операция яһатып ҡайтҡас, Семенюктың ҡулы яҡшы уҡ хәрәкәтләнә башланы.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Дөйөм бер маҡсат һәм бурысты тормошҡа ашырыу өсөн ойошторолған хәрби хәрәкәт. *Төнгө операция. Операция планы.*

**3.** Сауҙа, финанс һ. б. шундай эштәр буйынса килешеү. *Банк операцияһы.*

**4.** Технологик процестең бер йәки бер нисә эшсе тарафынан бер эш урынында башҡарылған айырым өлөшө. *Мин бер деталдә эшкәртеү өсөн ун ике операция башҡарам.* Я. Ҡолмой. / Хисаплау машинаһының башланғыс һандар менән программа командаһы буйынса башҡарған ниндәйҙер бер эше.

**ОПЕРЕ́ТТА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Йыр, һүҙ һәм бейеү ҡатнашҡан көлкөлө музыкаль сәхнә әҫәре, шундай әҫәр ҡуйылған театр. *«Ҡоҙаса» опереттаһы.* / Шул әҫәрҙең театрҙа башҡарылышы. *Оперетта ҡарау.*

**О́ПИСЬ** [*рус.*] *и.* Мал-мөлкәтте, кәрәкле ҡығыҙҙарҙы, документтарҙы һ. б. иҫәпкә алыу маҡсаты менән төҙөлгән исемлек. *Опись яһау.*

**О́ПИУМ** *и. ҡар.* **әфйүн.**

**ОПО́КА** [*рус.*] *и.* Төрлө деталдә ҡойоп эшләү өсөн хеҙмәт иткән төпһөҙ һәм ҡапҡаһыҙ йәшник; ҡойоу ҡалыбы.

**ОПОЛЧЕ́НЕЦ** [*рус.*] *и. ҡар.* **ополчин.**

**ОПОЛЧЕ́НИЕ** [*рус.*] *и.* Хәрби хеҙмәттән азат ителгән кешеләрҙән киҫкен һуғыш шарттарында төҙөлгән ярҙамсы ғәскәр. *Башҡалабыҙҙа халыҡ ополчениеһынан яңы 15 дивизия төҙөлдө.* Ә. Байрамов. / Батша армияһында баҫҡынсыларға ҡаршы сығыу өсөн төҙөлгән халыҡ ғәскәре. *[Башҡорттар] халыҡ ополчениеһы составында поляк интервенттарын туҡмаған.* Ә. Ихсан.

**ОПОЛЧИН** [*рус.* ополченец] *и.* Ополчение һалдаты. *Ҡалала ике запасной полк тора ине. Унда — күҙ алынған запас һалдаттар, ополчиндар.* Д. Юлтый.

**ОППОЗИЦИОНЕ́Р** [*рус.*] *и.* Оппозиция яҡлы кеше, оппозицияла торған кеше.

**ОППОЗИ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Йәмғиәт, ойошма эсендә күпселектең ҡарашына йәки политикаһына үҙ ҡарашын, политикаһын ҡаршы ҡуйған партия йәки төркөм. *Ғилми оппозиция. Парламент оппозицияһы. Оппозиция төркөмө.* **Оппозицияла тороу** (*йәки* **булыу**) берәй төркөмдөң ҡарашы йәки эшенә ҡаршылыҡ белдереү, ҡаршы тарафта тороу. *Студенттар ғына түгел, профессорҙарҙың алдынғы өлөшө лә батша хөкүмәтенә оппозицияла тора.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 4 март.

**ОППОНЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Бәхәс ваҡытында кемдеңдер фекеренә ҡаршы сыҡҡан кеше. *Рәсми оппонент. Оппонент булыу.*

**ОППОНЕНТЛАУ** *ҡ.* Бәхәс ваҡытында кемдеңдер фекеренә ҡаршы сығыу. *Уҡытыу процесында оппонентлауҙың, үҙ яуабыңды яҡлауҙың әһәмиәте сикһеҙ ҙур.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1966, № 3.

**ОППОРТУНИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Эшселәр хәрәкәтендә марксизм-ленинизмға дошман булған, пролетариаттың синфи мәнфәғәтен буржуазия мәнфәғәтенә буйһондороусы революцион көрәштән баш тартып, буржуазия менән килешеү политикаһын яҡлаған ағым. *Оппортунизмға ҡаршы көрәш.*

**ОППОРТУНИ́СТ** [*рус.*] *и.* Оппортунизм яҡлы кеше, оппортунизм политикаһын алып барған кеше. *Оппортунистарға ҡаршы көрәш.*

**ОППОРТУНИСТИК** *с.* Оппортунизмға мөнәсәбәтле. *Оппортунистик ағым. Оппортунистик төркөм. Оппортунистик ҡараш. Оппортунистик теория.*

**ОПРИ́ЧНИК** [*рус.*] *и. тар.* Опричнинала хеҙмәт иткән дворян.

**ОПРИ́ЧНИНА** [*рус.*] *и. тар.* **1.** Иван Грозныйҙың баярҙар һәм кенәздәр оппозицияһын ҡыйратыу, үҙәкләштерелгән дәүләтте нығытыу маҡсатында башҡарған ғәҙәттән тыш саралары.

**2.** Иван Грозныйҙың кенәз һәм баярҙар оппозицияһына ҡаршы көрәшеү өсөн тотҡан махсус ғәскәре.

**О́ПТИК** [*рус.*] *и.* **1.** Оптика өлкәһендәге белгес.

**2.** Оптик быяла һәм приборҙар яһау оҫтаһы. *Оптик булып эшләү.*

**ОПТИ́К** *с.* Оптика (1 мәғ.) күренештәренә мөнәсәбәтле. *Оптик күренеш.*

**О́ПТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Физиканың яҡтылыҡ үҙенсәлектәрен һәм есем менән үҙ-ара мөнәсәбәтен өйрәнә торған бүлеге. *Оптика законы.*

**2.** *йыйн.* Яҡтылыҡ нурының сағылыу һәм һыныу закондарына нигеҙләнгән ҡорал-ҡорамал. *Оптика магазины.*

**ОПТИМАЛЬ** [*рус.* оптимальный] *с. кит.* Иң уңай, иң яҡшы. *Оптималь режим. Оптималь шарт.*

**ОПТИМИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Киләсәккә ышанып, тормошҡа өмөт менән ҡарау тойғоһо, һәр нәмәнең яҡшы яғын күреү. *Улемесле ауыр шарттарҙа ла башҡорт халҡы үҙенең оптимизмын һаҡлай һәм үҫтерә килгән.* Ә. Харисов.

**ОПТИМИ́СТ** [*рус.*] *и.* Киләсәккә ышанып, тормошҡа өмөт менән ҡарай торған кеше; оптимизм менән һуғарылған кеше. *Тормоштоң иң драматик картиналарын һүрәтләгәндә лә шағир оптимист булып ҡала.* Н. Нәжми.

**ОПТИМИСТИК** *с.* Оптимизм менән һуғарылулы. *Оптимистик ҡараш. Оптимистик шиғыр.*

**ОПТО** *и.* Һаҙандар ғаиләһенә ҡараған эре тәңкәле, ҡыҙғылт ҡанатлы, ҡарағусҡыл арҡалы ҙур аҡ балыҡ. *Ебеткән борсаҡҡа, бешкән һоло менән бойҙайға опто, ҡараганат һәйбәт ҡаба.* Ә. Чаныш.

**ОПТОСАҠ** *и.* Бәләкәй опто.

**ОРАН** *и.* **1.** *тар.* Ырыуҙың билдәһе итеп алынып, шул ырыуҙы бер ергә саҡырғанда йәки яуға ҡуҙғатҡанда ҡысҡыра торған шартлы һүҙ. *[Һәүбән — Айһылыуға:] Йөрәге етһә атаңдың, оран һалһын йортона Шулгәнгә яу асырға.* «Аҡбуҙат». *[Мәктым:] Егет! Атама төбәп килдеңме, йәйләүгә төбәп килдеңме? Атама төбәһәң, сәләм бирер инең, йәйләүгә төбәһәң, оран бирер инең.* «Ҡара юрға».

**2.** Ил, халыҡты ҙур бер эшкә, көрәшкә, яуға саҡырған ҡайнар өндәмә. *Оран һалыу.* ■ *Йәмәлкә тигән ир-батыр .. янған уттай ялҡынлап, халыҡҡа оран ташлаған.* Салауат Юлаев.

**3.** *күсм.* Күмәк халыҡҡа иғлан итеү өсөн ҡысҡырылған хәбәр. *[Александр] халыҡ ялыу менән йөрөмәһен өсөн, оҙаҡ ваҡыттар буйы сапҡындар ебәреп, бөтә яҡҡа орандар ҡысҡыртты.* «Ағиҙел», 1962, № 12.

**4.** *диал.* Һөрән.

**ОРАНГУТА́НГ** [*рус.* ‹ *мал.*] *и.* Суматра һәм Борнео утрауҙарында йәшәгән кеше ҡиәфәтле ҙур маймыл.

**ОРАНЖЕРЕ́Я** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Йылы яратҡан үсемлектәрҙе ҡыш көнө үҫтереү өсөн хеҙмәт иткән тотош быяла йылы бина. *Ботаника баҡсаһының оранжереяһы. Оранжерея сәскәһе.*

**ОРАНЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **оранлау.**

**ОРАНЛАУ** *ҡ.* Оран ҡысҡырыу, оран һалыу. *Оранлап йөрөү.*

**ОРАНЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **оранлау.**

**ОРА́ТОР** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Халыҡ алдына сығып, телмәр һөйләгән кеше. *Ораторҙар килделәр, «Долой һуғыш!» — тинеләр. Шул ваҡытта эфисәрҙәр ҡара янып йөрөнөләр.* / Телмәр тотоуға оҫта кеше; оҫта телмәрсе. *Оратор булыу.*

**ОРАТО́РИЯ** [*рус.* ‹ *ит.*] *и.* Хор, йырсы солист һәм оркестр өсөн драматик сюжетта концертҡа тәғәйенләп яҙылған ҙур музыкаль әҫәр.

**ОРБИ́ТА** [*рус.* ‹ *лат.*] *и. астр.* Күк есеменең йыһан арауығында икенсе бер күк есеменә нисбәтән хәрәкәт иткән юлы. *Марс орбитаһы. Селеноцентрик орбита.*

**ОРБИТАЛЬ** [*рус.* орбитальный] *с.* Орбита буйлап әйләнә торған. *Орбиталь ракета.*

**О́РГАН** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* **1.** Теге йәки был өлкәлә билдәле бер эш башҡара торған ойошма. *Милиция органдары. Мәғариф органдары. Прокуратура органдары. Суд органдары. Урындағы органдар. Финанс органдары. Һайлау органдары. Хөкүмәт органдары. Хужалыҡ органдары.*

**2.** Берәй партия, берекмә, ойошма ҡулындағы газета-журнал. *«Ленин юлы» журналы ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә комитеты органы булып 1928 йылдың апрелендә сыға башланы.* Т. Йәнәби.

**3.** *ҡар.* **ағза** 1.

**ОРГА́Н** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Күректән төрлө көпшәләр үтә тын өрҙөрөп уйнай торған баҫмаҡлы бик ҙур музыка ҡоралы. *Орган тауышы. Органда уйнау.* / Төрлө автоматик тынлы музыка ҡоралдарының атамаһы. *[Өйҙөң] икенсе башында бер орган оҙон көй уйнай.* А. Таһиров.

**ОРГАНИ́ЗМ** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* **1.** Үҙ алдына йәшәү, үҫеү, үрсеү һәләте булған һәр төрлө тереклек (кеше, хайуан, үҫемлек). *Ябай организм. Күп күҙәнәкле организм.*

**2.** Айырым бер кешенең бөтә булған физик һәм рухи үҙенсәлектәре.

**ОРГАНИК**[1] *с.* Тереклек итеү процесы менән билдәләнгән; тере. / Хайуан һәм үҫемлектәрҙең тарҡалыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән. *Органик ашлама. Органик матдә. Органик яғыулыҡ.*

◆ **Органик химия** химияның углеродтың башҡа элементтар менән булған төрлө берләшмәһен өйрәнә торған бүлеге.

**ОРГАНИК**[2] *с.* Ниҙеңдер төп асылын, нигеҙен тәшкил иткән; тығыҙ бәйләнештә булған. *Совет әҙәбиәтенең органик бер өлөшө булған башҡорт совет әҙәбиәте лә һуғыштан һуңғы йылдарҙа яңы уңыштарға өлгәште.* М. Ғималова.

**О́РГИЯ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* **1.** Боронғо Грецияла: эскелек аллаһы хөрмәтенә үткәрелгән байрам.

**2.** *күсм.* Тәртипһеҙ эскелек мәжлесе.

**ОРҒАСАҠ** *с. диал.* Орғасы. *Ҡатын-ҡыҙға андыҙҙың иркәгән, ирҙәргә орғасағын эсерергә кәрәк.* (Һынамыш).

**ОРҒАСЫ** *с.* Инә енесле (быҙау, бәрәскә ҡарата). *Быйыл нәҫел өсөн ике йөҙ баш орғасы башмаҡ ҡалдырырға уйлайбыҙ.* Р. Низамов.

**ОРДА́** [*рус.* ‹ *төрк.*] *и. ҡар.* **өйөр** 3.

**О́РДЕН** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* **1.** Хеҙмәттә, һуғышта һ. б. күрһәткән батырлыҡтар өсөн бирелә торған төрлө дәрәжәләге махсус бүләк билдәһе. *Ленин ордены. «Ватан һуғышы» ордены. Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены. Орден алыу. Орден калодкаһы. Орден менән бүләкләү. Орден тағып йөрөү. Орден тапшырыу.*

**2.** *тар.* Католик монахтары йәки рухани рыцарҙарының билдәле бер уставлы йәмғиәте. *Иезуиттар ордены. Ливон ордены. Тевтон ордены.*

**ОРДЕНЛЫ** *с.* Орден менән бүләкләнгән, орден алған. *Орденлы завод. Орденлы яҙыусы.*

**О́РДЕР** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Ниҙәлер алыу йәки биреү тураһындағы күрһәтмә ҡағыҙы; яҙма бойороҡ. *Ҡулға алыу ордеры. Квартир ордеры.*

**ОРДИНА́РЕЦ** [*рус.* ‹ *фр.*] *и. ҡар.* **ординарсы.**

**ОРДИНАРСЫ** *и.* Командир янында йәки штабта төрлө йомоштар үтәүсе ғәскәри хеҙмәткәр. *Ординарсы булып йөрөү.* ■ *Яҡшы күк ат менгән бер һалдат юлдан уҙҙы. Ул ашығыс пакет менән барған ординарсыға оҡшай.*

**ОРДИНА́ТА** [*рус.* ‹ *лат.*] *и. мат.* Нөктәнең арауыҡтағы урынын билдәләгән өс координаттың береһе.

**ОРДИНА́ТОР** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Больница һәм клиникаларҙа: бүлек мөдиренең ҡул аҫтында эшләгән дауалаусы врач.

**ОРДИНАТУ́РА** [*рус.*] *и.* Күнекмә бирә торған медицина аспирантураһының бер төрө. *Клиник ординатура. Ординатураны тамамлау.*

**ОРҘО-БӘРҘЕ** *с.* Ҡапыл уйлап, шарт та март эшләүсән. *Орҙо-бәрҙе кеше.* // *Орҙо-бәрҙе эшләү.*

**ОРҘОМША** *и. иҫк. һөйл.* **1.** Бүтәндәр иҫәбенә үҙ файҙаһын күҙәткән кеше.

**2.** Көткәндән артыҡ төшөп, иҫәптән тыш килеп, өҫтәмә файҙа биргән нәмә. *Һарыҡ икене бәрәсләгән, береһе орҙомша булған.*

**ОРҘОРОУ** *к.* **1.** Ташлатыу, бәрҙереү. *Таш орҙороу.*

**2.** Һуктырыу. *Таяк менән орҙороу.*

**ОРЕО́Л** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Яктырып, янып торған нәмәне дүңгәләкләп уратып алған якты нур. *Ерҙең түңәрәге матур зәңгәр төҫтәге ореол менән уратып алынған һымак.* «Совет Башкортостаны», 1968, 12 апрель.

**2.** *фото* Янып, ялтлап торған нәмәнең фото һүрәтендә барлыкка килгән якты кулса. *Негативтағы һүрәттең ореолы.*

**ОРИГИНА́Л** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Яҙманың йәки сәнғәт әҫәрҙәренең тәүге өлгөһө; төп нөсхә. *Салауат шиғырҙарының үҙ оригиналы беҙгә килеп етмәгән.* «Башкорт поэзияһы», 1953. / Тәржемә өсөн сығанак булған текст. *[Тәржемә] әҫәрҙәре ауыр тел менән бирелә; айырым һөйләмдәрҙе аңлау өсөн бер кулыңа оригиналдың үҙен тотоп укырға кәрәк.* Ә. Харисов. / *типогр.* Набор (2 мәғ.) йәһау өсөн бирелгән кульяҙма. *Бер бүлмәлә корректура укып ултыралар.. Береһе укый, икенсеһе оригиналдан карап бара.* Ғ. Ибраһимов.

**ОРИГИНАЛЬ** [*рус.* оригинальный] *с.* **1.** Төп нөсхә сифатындағы. *Оригиналь экземпляр.*

**2.** Үҙ аллы ижад һөҙөмтәһендә барлыкка килгән, сит йоғонтонан азат булған; үҙ аллы. *Оригиналь әҙәбиәт.*

**3.** Башкаларға окшамаған; үҙенсәлекле. *Оригиналь кеше. Оригиналь фекер. Оригиналь булыу.* ■ *Салауат Юлаевтың әҙәби мираҫы ҙур түгел. Әммә ул үҙенең тәрән йөкмәткеле, халыксан,.. оригиналь поэтик образлы булыуы менән киммәт.* Ә. Харисов.

**ОРИЕНТАЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* Ориенталистика буйынса белгес.

**ОРИЕНТАЛИ́СТИКА** [*рус.*] *и.* Көнсығыш илдәренең тарихын, экономикаһын, телен, бөтә тормошон өйрәнә торған фәндәр йыйылмаһы.

**ОРИЕНТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Үҙең торған йәки йөрөгән урындың билдәләнеше. *Баш әйләнә, ориентация юғала. Беҙҙең окоп алдамы, арттамы — белер хәл юк.* Д. Юлтый.

**2.** *күсм.* Төрлө хәл-мәсьәләне аңлап, дөрөҫ юл таба белеү һәләтлеге.

**3.** *күсм.* Эш-хәрәкәттә кемгә йәки нимәгәлер төбәлгән, иҫәп тоткан йүнәлеш. *Ориентация тотоу.* ■ *Мәктәптә йәш быуынға профессиональ ориентация биреү мөһим бурыстарҙың береһе булып тора.* «Башкортостан укытыусыһы», 1969, № 5.

□ **Ориентация йәһау** ориентирлашыу.

**ОРИЕНТИ́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Хәрәкәттең йүнәлешен билдәләгән бер нәмә (ағас, өй, маяк һ. б.). *Уң як ярҙан артиллерия уты асыу өсөн ориентирҙар хәбәр ителде.* Ғ. Әхмәтшин.

**ОРИЕНТИРЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **ориентирлау.**

**ОРИЕНТИРЛАУ** *к.* **1.** Торған урынды һәм хәрәкәт иткән йүнәлеште билдәләргә мөмкинлек биреү. *Сираттағы бәйләнештә станцияны дөйөм ориентирлау буйынса кәрәкле операциялар үтә[де]...* «Совет Башкортостаны», 1971, 23 июнь. / Картаны, приборҙы һ. б. китғаның төрлө яктарына карата дөрөҫ урынлаштырыу. *Компас менән ориентирлау. Планшетты ориентирлау.*

**2.** *күсм.* Хәлде, мәсьәләне аңларға, дөрөҫ фекергә килергә ярҙам итеү. *Халык-ара хәл мәсьәләләрендә ориентирлау.*

**3.** *күсм.* Кемдеңдер алдына билдәле максат куйыу, артабанғы эшенә йүнәлеш биреү. *Йәштәрҙе ауырлыктарҙы еңеүгә ориентирлау. Малсылыкты үҫтереүгә ориентирлау.*

**ОРИЕНТИРЛАШЫУ** *к.* **1.** Ниндәйҙер ориентирға карап, торған урын һәм йүнәлеште билдәләү. *Ориентирлашып алыу. Ориентирлашыу буйынса ярыш.*

**2.** *күсм.* Берәй нәмәнең айышына төшөнөп, аңлап алыу. *Ориентирлашыу һәләтлеге.*

**3.** *күсм.* Эш-хәрәкәттә нимәгәләр төбәлеп, иҫәп тотоп, йүнәлеш алыу. *Күп укыусыларға ориентирлашыу.*

**ОРКЕ́СТР** [*рус.* ⟨ *фр.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Музыкаль әҫәрҙе бергә башкарған төрлө музыка коралы һәм төрлө музыка коралында бер музыкаль әҫәрҙе башкарған коллектив. *Тынлы оркестр. Симфоник оркестр. Халык инструменттары оркестры.*

**2.** Театрҙың сәхнә алдындағы музыканттар урыны.

**ОРЛОК** *и.* **1.** Үҫемлектең нәҫелен дауам итә торған емеш. *Ағас орлоғо. Билсән орлоғо.* / Үҫемлектең сәсеү өсөн әҙерләнгән емеше. *Сортлы орлок. Таҙа орлок. Тос орлок. Тыу орлок. Калибрланған орлок. Арыш орлоғо. Киндер орлоғо. Кара һуған орлоғо. Карбуз орлоғо. Орлоктоң сығышы. Орлок тикшереү лабораторияһы. Орлок һалыу.* ■ *Орлокка тип һалған ашлығын ул [Хәсән] кыш көнө үк тарттырып, ашап бөттө.* К. Мәргән.

**2.** *күсм.* Үрсем өсөн калдырылған инә мал. *Йылкы орлоғо. Мал орлоғо.*

**3.** *күсм.* Ниҙелер барлыкка килтереп, башланғыс бирә торған сәбәп. *[Иблис:] һүҙ менән иретеп уларҙы, йомшартып, үҙ-үҙемде изгеләрҙән күрһәтеп, орлоғом һиптем уларҙың [әҙәмдәрҙең] күлбенә, каршы килһендәр өсөн раббы әмеренә.* Ш. Бабич.

♦ **Орлок биҙе** ир енесенең үрсем орлоғо эшләп сығара торған биҙе. **Орлоғо Бохарала түгел** таба алмай торған һирәк нәмә түгел тигән мәғәнәлә әйтелә.

**ОРЛОКЛАНЫУ** *к.* Орлок хасил булып, орлокло хәлгә килеү. *Һәр төрлө үлән, сәскәһен койоп, үҙенсә орлокланды.* Ш. Янбаев.

**ОРЛОКЛО** *с.* Орлоғо булған, орлок бирә торған. *Бер орлокло емештәр. Күп орлокло алабута. Түңәрәк орлокло сырмалсык.*

**ОРЛОКЛОК** [1] *с.* **1.** Орлок итеп сәсеүгә әҙерләнгән. *Орлоклок арыш.*

**2.** Сәсеү орлоғо алыуға тәғәйенле. *Орлоклок баҫыу.*

**ОРЛОКЛОК** [2] *и. шул ук* **орлок биҙе** (*кар.* **орлок**).

**ОРЛОКСОЛОК** *и.* Сәсеү орлоғо етештереү һәм орлоктоң сифатын якшыртыу өлкәһендәге эш. *Орлоксолок совхозы. Орлоксолокто якшыртыу.*

**ОРМАҺАР** *с. һөйл.* Уны-быны уйламай, бәреп-һуғып эшләүсән; орҙо-бәрҙе. *Ормаһар кеше.*

**ОРМАҺАРҘА** *р. һөйл.* Дәртләнеп китеп бер тотонғанда, ҡыҙған саҡта. *Ормаһарҙа эшләп ташлау.*

**ОРМОТ** *и. диал.* Тыуған яҡ.

**ОРНАМЕНТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Төрлө семәр йәки бик ябайлаштырылған төрлө һүрәтте билдәле бер тәртиптә ҡабатлау юлы менән эшләнгән биҙәк. *Башҡорт орнаменты.* ■ *Беҙ үҙган утарҙарҙың бөтәһендә лә төрлө-төрлө орнаменттар менән семәрләнгән ҡоҙоҡтарҙы күрҙек.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 13 ғинуар.

**2.** Музыкаға, көйгә моң, матурлыҡ биргән төрлө биҙәк.

**ОРНАМЕНТАЛЬ** [*рус.* орнаментальный] *с.* Орнаментҡа мөнәсәбәтле. *Орнаменталь биҙәк. Орнаменталь сәнғәт.*

**ОРНАМЕНТИКА** [*рус.*] *и.* Орнамент биҙәктәренең тәбиғәте, ниндәйҙер стилдәге орнамент биҙәктәре. *Башҡорт орнаментикаһында гөл-сәскә өҫтөнлөк иткән.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1971, № 1.

**ОРНИТОЛОГ** [*рус.*] *и.* Орнитология өлкәһендә эшләгән белгес. *Орнитологтар кәңәшмәһе.*

**ОРНИТОЛОГИЯ** [*рус.*] *и.* Зоологияның ҡоштарҙы өйрәнә торған бүлеге. *Орнитология станцияһы.*

**ОРО** [1] *и.* **1.** Тире менән ит араһында барлыҡҡа килгән төйөр; үҫмәй ҙә, һыҙламай ҙа, гел бер ҙурлыҡта тора торған шешек. *Ороло баш.* ■ *Уның [указлы мулланың] башы тап-таҡыр итеп ҡырылған, түбә сусағында ғына ҙур бер ороһо бар.* Б. Бикбай. / Аттың аяғында була торған ҡаты шешек.

**2.** Ағастың сурайып торған боҙоҡ урыны; бирес. *Ҡайын ороһо. // Оро табаҡ.* ■ *Күпте күргән оро ашлау ... Айырмаған ул ҡунаҡты, өләшкән һыйҙарын.* В. Әхмәҙиев. / Үҫемлектәрҙең япраҡ, һабағында төрлө ҡоротҡостар арҡаһында барлыҡҡа килгән шеш; тыңҡауыҡ.

**3.** *диал.* Бөкрө, көмрө.

**ОРО** [2] *и. диал.* **1.** Ҡоҙоҡ.

**2.** Соҡор. *Ороло күл буйы ҡыйғыл асыҡ* (Халыҡ йырынан).

**ОРО** [3] *и. диал.* Уғры.

**ОРОЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Оро[1] (1, 2 мәғ.) һалыу, ороло булыу. *Башы ороланып тора. Имәнороланған.*

**2.** Оро[1] (1, 2 мәғ.) рәүешендә булыу. *Ороланып ҡалыу. Ороланып тороу.*

**ОРОЛОП-ҺУҒЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** Тегендә ҡағылып, бында бәрелеү. *Оролоп-һуғылып, бөтә нәмә ватылып бөткән.*

**2.** *күсм.* Йәбер, яфа сигеү; ҡағылып-һуғылыу. *Оролоп-һуғылып үҫеү.*

**ОРОЛОУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ороу.**

● *Оло һүҙен тыңламаған оролған да бәрелгән.* Әйтем.

**ОРОМ** *и. диал.* Орпаҡ.

**ОРОМЖА** [*рус.* ронжа] *и.* Һалды беркеткән арҡыры бүрәнә. *Арҡан тарткан көслө беләктәргә оромжалар түҙмәй бөгөлә.* Ғ. Йосопов.

**ОРОМЛО** *с. диал.* **1.** Ағай-энеле, нәҫелле, нәсәпле. *Оромло кешеләр.*

**2.** Танылған, юғары нәҫелле.

**ОРОМ-ОРПАҠ** *и. йыйн.* Бер атанан таралған быуын-быуын кешеләр; нәҫел-нәсәп. *[Ҡарамырҙа:] Ҡара ергә тығам, кисерешем юк, ором-орпағыңды ҡалдырмай.* Х. Ғәбитов.

**ОРОНДОРОУ** [1] *ҡ. йөкм. ҡар.* **ороноу** [1].

**ОРОНДОРОУ** [2] *ҡ. йөкм. ҡар.* **ороноу** [1]. *Әбей яҡынлай башлаһа, Айыуголаҡ көл һибеп ебәрә икән, ти. Әбей күҙен ыуалай-ыуалай ҡыуа икән, ти. Айыуголаҡ тағы көл һибеп уны орондора икән, ти.* (Әкиәттән).

**ОРОНОУ** [1] *ҡ.* **1.** Ҡул менән тейеү, ҡул тейҙереү. *Алты йәшлек балаһы ҡорттар сығып ҡаманы. Умартаға оронма тип, ҡумәкләшеп таланы.* Х. Ғәбитов. *Малайҙы ҡыҫып ҡосаҡлағым килһә лә, оронорға баҙнат итмәйем.* «Ағиҙел», 1968, № 12. *Унда [һарайҙа] алтындар, гәүһәрҙәр, яҡуттар ятыр. Уларға оронма* (Әкиәттән).

**2.** Ҡул тейҙереп, йәберләү; һуғыу. *Балаға ороноу.*

**ОРОНОУ** [2] *ҡ. диал. ҡар.* **мәшәҡәтләнеү** 2. *Өй эше менән ороноу.*

**ОРОНСАҠ** *с. һөйл.* Тик тормай, теләһә нимәгә ҡағылып-һуғылып, тейеп барыусан. / Ҡулы тик тормай, күренгән нәмәне алып, тейеп барыусан; ҡулсыр. *Оронсаҡ бала. Оронсаҡ булыу.*

● *Оронсаҡ атта ял юҡ.* Мәҡәл.

**ОРОНСОҠ** *и.* **1.** Йәйһыҙлап, уңайһыҙлыҡ килтереп торған нәмә; ҡамасау, мәшәҡәт. *Оронсоҡ булыу. Оронсоҡ күреү. Оронсоҡ яһау. // Оронсоҡ эш.* ■ *[Хәлил] күпер аҫтына тығылған ағастарҙы багор менән эләктереп, тартҡылай башланы. Был сикһеҙ ауыр, оронсоҡ эш ине.* Б. Дим.

**2.** Тормоштағы берәр етешһеҙ урын; кәрәк-яраҡ. *Башмаҡты аҫырайыҡ әле, бер оронсоҡҡа ярар.*

**ОРОНСОҠЛАУ** *ҡ.* Уңайһыҙлыҡ, яйһыҙлыҡ килтереү; ҡамасаулау, мәшәҡәтләү. *Олкаман .. оронсоклап ултырған килене тибеп йыҡты.* Ш. Насыров.

**ОРОНСОҠЛО** *с.* Яйһыҙлыҡ, уңайһыҙлыҡ килтергән; мәшәҡәтле.

**ОРОП-БӘРЕҮ** *ҡ. һөйл.* Тегендә-бында һуғыу; ҡағып-һуғыу.— *Бында ике ҡунаҡ килгән. Теге ерәнде еғеп, тиҙ генә райкомға ебәрегеҙ әле. Һағыраҡ булһындар, әллә ҡайҙа ороп-бәреп китмәһен.* Р. Ниғмәти.

**ОРОП-ҺУҒЫУ** (ороп-һуҡ*ы*) *ҡ. һөйл.* **1.** Тегендә ҡағып, бында бәреү; ҡағып-һуғыу. *Ороп-һуғып алып барыу.*

**2.** Төрлөсә рәнйетеү; туҡмау. *Ул заманда тыныслыҡ һис булмаған... Көслөләре насарҙарын ороп-һуғып, үлтергән берен-бере хурлыҡ менән.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ОРОУ** *ҡ.* **1.** Берәй нәмәне кемгә йәки нимәгәләр табан һелтәп, ҡулдан ысҡындырыу; бәреү, ташлау. *Таш күтәргән ҡулды тотоп, була, орған ташты булмай туҡтатып.* Р. Ғарипов. *Айыуголаҡ бабайҙы һаҡалынан тотоп ергә ора* (Әкиәттән).

**2.** Берәй нәмә менән кемгә йәки нимәгәләр һелтәп тейҙереү; һуғыу. *[Дәрүиш — Диуанаға:] Бушты лығырлама, маңлайыңа шайтан мөһөр*

*баҫкан нәмә! Бынау таяк менән орормон.* М. Кәрим.

♦ **Айбар ороу** *кар.* **айбар. Алла түбәндән орһон** нык ҡарғағанда әйтелә. **Баш ороу** уйлап тормай, дыуамал рәүештә (ниҙер эшләү). *Баш ороп сығып китеү.* **Башты ергә** (*йәки* **ташҡа) ороу** ҙур ҡайғы, сараһыҙлыҡ белдереү. *Башын ергә ороп иланы ла, ти, һунарсы, ҡул һелтәп, башы һуккан якка сығып китте, ти* (Әкиәттән). **Бүректе ергә ороу** *шул ук* **кәпәс һуғыу** (*кар.* **кәпәс**). **Гәп ороу** *шул ук* **гәп һатыу** (*кар.* **гәп**). **Ғәйрәт ороу** *диал.* ғәйрәтләнеү. *[Ротный] һалдатты һүгә, наганын сығарып, атам тип, гәйрәт ора.* А. Таһиров. **Йөҙ ороу** түбәнлек менән мөрәжәғәт итеү, өндәшеү. **Лаф ороу** *кар.* **лаф. Нәғрә ороу** *кар.* **нәғрә. Хоҙай** (*йәки* **ҡәһәр, ен) орған** шелтәләгәндә, ҡарғағанда әйтелә.

● *Орһа ла, анам кулы орһон.* Әйтем.

**ОРОШ** *и. иҫк. кар.* **һуғыш.**

□ **Орош ҡылыу** һуғышыу. *Ул ерҙә аждаһа йылан пәйҙә булды .. Уның менән орош ҡылдылар.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ОРОШҠАҠ** *с.* **1.** Һәр ваҡыт әрләп-тиргәп тороусан.

**2.** *диал.* Һуғышҡаҡ.

● *Арык кәзә тартышкак, яман әҙәм орошкак.* Мәҡәл.

**ОРОШОУ** *к.* **1.** Асыуланып, шелтәле һүҙҙәр әйтеү; әрләү, тиргәү. *Афәт килде, гумер бөттө, тигәндәрҙең берәм-берәм бөтәһен дә [хан] орошоп сыкты.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *Таҙҙы тукмау түгел, орошмай ҙа башланылар, ти* (Әкиәттән).

**2.** *кар.* **һуғышыу** 1.

**ОРОШ-ТАЛАШ** *и. йыйн.* Күмәк тартыш; ыҙғыш.

**ОРПАҠ** *и.* Бер сығанаҡтан таралған йәш быуын; нәҫел, нәсәп. *Беҙҙең орпакта ундай хәл булганы юк.* М. Тажи.

**ОРСОҠ** *и.* **1.** Ҡул менән йөн, еп һ. б. иләү өсөн ҡулланылған ҡорал (бер башын юныл, икенсе башын тупалсыҡ итеп яһаған 25—30 см оҙонлоғондағы таяҡ). *Дебет орсого. Киндер орсого. Йөн орсого.* **Аяҡ орсоғо** аяҡ менән әйләнтеп иләй торған ҡорал. **Орсоҡ башы** *кар.* **орсоҡбаш.** / *кусм.* Тик ултырмаған, гел әйрәләп торған кешегә ҡарата әйтелә (ғәҙәттә ҡыҙ балаға әйтәләр).

**2.** Төрлө ҡорамалдың әйләнеп торған үҙәк өлөшө. *Капка орсого. Сепаратор орсого.*

♦ **Орсоҡ кеүек** шәп әйләнгәндә йәки әйрәләп йөрөп етеҙ эшләгәндә белдереү өсөн әйтелә. *Орсок кеүек ойогaнда йәш йөрәгең елкенһен.* Ҡ. Даян. *Мин тырышам, орсок кеүек әйләнеп кенә торам.* З. Биишева.

**ОРСОҠБАШ** *и.* Оҙаҡ, шәп әйрәлһән өсөн орсоҡтоң түбәнге осона кейҙереп ҡуйыла торған һәлмәк дүңгәләк. *Уң беләкәйемде талдыра орсок кына менән орсокбаш* (Халыҡ йырынан).

**ОРСОҠТАЙ** *с.* Бәләкәй генә. *«Бисәң дә шул орсоктай балага каныккан. Ниткән тукмау ул гел генә?» — тине өләсәй.* Ғ. Ғүмәр.

**ОРСОҠТАШ** *и. диал.* Орсоҡбаш.

**ОРТОДОКСАЛЬ** [*рус.* ортодоксальный ‹ *гр.*] *с. кит.* Ниндәй ҙә булһа ҡараштың, тәғлимәтте тайпылышһыҙ, әҙмә-әҙлекле тотҡан.

**ОРТОПЕДИК** *с.* Ортопедияға, кәкрәйгән аяҡ-ҡул һәм умыртҡаны дауалауға мөнәсәбәтле. *Ортопедик аппарат. Ортопедик гимнастика.*

**ОРТОПЕ́ДИЯ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Медицинаның аяҡ-ҡул һәм умыртҡа һөйәктәре кәкрәйгәнен өйрәнә, киҫәтә һәм дауалай торған бүлеге.

**ОРУҒ** *и. иҫк. кар.* **ырыу** [1].

**ОРУ́ДИЕ** [*рус.*] *и.* Артиллерия ҡоралдарының дөйөм атамаһы; туп. *Үҙе йөрөмәле орудие. Орудие лафеты. Орудие расчёты.* ■ *Арттарак, кыуаклыкта тагы ла дүрт орудие бар, улар танкыга каршы ата.* Ә. Ихсан.

**ОРФОГРАФИК** *с.* Орфографияға мөнәсәбәтле. *Орфографик кагиҙә. Орфографик хата. Орфографик һүҙлек.*

**ОРФОГРА́ФИЯ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Айырым телдәге дөйөм ҡабул ителгән дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре. *Орфография принцибы.* / Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләренең үтәлеше. *Орфография тотоу.*

**ОРФОЭПИК** *с.* Орфоэпияға мөнәсәбәтле. *Орфоэпик кагиҙәләр. Орфоэпик һүҙлек.*

**ОРФОЭ́ПИЯ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Дөрөҫ әҙәби әйтелеште билдәләй торған ҡағиҙәләр. *Орфоэпия нормалары.* / Дөрөҫ әйтелеш ҡағиҙәләренең үтәлеше.

**ОРХИДЕ́Я** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Матур баҙыҡ сәскәле, хуш еҫле тропик үҫемлек.

**ОС** *и.* **1.** Ниҙеңдер нәҙегәйә барып бөткән ере. *Танау осо. Тел осо. Эйәк осо.* ■ *Уның [Иркәнең] бит остары яна башланы.* Ә. Вәли. / Нәҙек оҙон нәмәнең ослайып сәнсеп торған үткер башы. *Беҙ осо. Бысак осо. Кәләм осо. Мөгөҙ осо. Һөңгө осо. Энә осо.*

**2.** Нәҙек оҙон йәки оҙонға һуҙылған нәмәнең барып бөткән аҙағы һәм шул аҙағына яҡын өлөшө. *Бармак осо. Билгау осо. Дилбәгә осо. Еп осо. Керпек осо. Мыйык осо. Сыбыркы осо. Таяк осо.* ■ *Был күлдең бер осо немец ягына бара.* Д. Юлтый. *Аркандың бер осон иптәштәренә тоттороп, икенсе осон биленә бәйләп, Акъял батыр түбән төшөп киткән, ти* (Әкиәттән). / Үргә ҡарай нәҙегәйеп киткән нәмәнең юғарғы нөктәһе һәм шуға яҡын өлөшө. *Агас осо. Камыш осо. Манара осо.* ■ *Был тирәк шул тиклем бейек, осо куккә олгашкан, ти* (Әкиәттән). / Кейем-һалымдың мөйөшләнеп торған ере йәки барып бөткән аҫҡы сите. *Алъяпкыс осо. Шәл осо. Яулык осо.* ■ *Шәүрә килен кейгән ай еләндең итәк оскайҙары мунсаклы* (Халыҡ йырынан). / Ауылдың, урамдың һ. б. тамамланған урыны, берәр яҡ сиге. *Ауыл осо. Урам осо. Аргы ос. Бирге ос. Түбәнге ос. Үрге ос.*

**3.** Эш-хәлдең йәки берәй нәмәнең һуңы, аҙағы. *Һүҙенең осо юк.* ■ *[Карлугас:] Бер ҙә яфаларҙың осконаһы күренерҙәй түгел.* Б. Бикбай.

**4.** Төпкө аттың алдындағы егеү урыны; сыбата. *Оска егеү. Остагы ат.*

**5.** *диал.* Туҡыманың бер киҫәге йәки төргәге. *Ике ос буҫтау.*

♦ **Аяҡ осо** 1) түшәктең аяҡ һала торған яғы. *Аяк осона килеп баҫыу;* 2) *диал.* баҡсалыҡтың өйгә төкәлмәгән арғы башы. *Зәбиҙә .. аяк осондагы шишмәгә һыуга китте.* Ғ. Әмири. **Баш осо**

1) түшәктең башты һала торған яғы. *Кыҙҙың баш осона баҫып, ана уләә, бына уләә, тип торалар, ти* (Әкиәттән); 2) үрҙәге, баш тәңгәлендәге тараф. *Баш осонан яңғыҙ кыр өйрәге бажкылдап осоп китте.* Б. Бикбай. **Ептең осо** йәшерен эштең эҙенә төшөрөрлөк дәлил. *[Зөлфирә:] Бөтә эште һин бутаның. Хәҙер ептең осон да табып булмай.* И. Абдуллин. **Күҙ осо** *шул уҡ* **күҙ ҡойроғо** (*кар.* **күҙ** 1). **Ҡул осо** *кар.* **ҡул** [1]. **Осона сығыу** 1) берәй нәмәнең аҙағына барып етеү, берәй эште тамам итеү; бөтөрөү. *Һүҙҙең осона сығыу.* ■ *Оҙон-оҙон, оҙон юл, осона сыҡкан бар микән?* (Әкиәттән); 2) иҫәбенә сығыу, иҫәбенә етеү. *[Бабай:] улым, һин бик бай булырһың, малыңдың осона сыға алмаҫһың* (Әкиәттән); 3) эш-хәлдең айышына төшөү, асылын сисеү; асыҡлау. *[Егет] уйлап-уйлап, ошо ғәжәп эште, сыға алмай һаман осона.* М. Ғафури; 4) йәшерен эштең эҙенә төшөү, тикшереп йөйөн табыу. *Маслопромға тапшырырға алып барған майҙың байтағы һеңде лә ҡуйҙы. Бар, осона сығып ҡара.* Б. Бикбай; 5) берәй нәмәне юҡ итеү, башына етеү; бөтөрөү. *Аҡсаның осона сығыу.* ■ *Ғаббас мулла, ит бәлешенең осона сығып, һыйлаусының күңеле булһын өсөн ныҡ ҡына кикереп .. алды.* З. Биишева. **Осон төйнәү** эште тамам итеү, аҙағына еткереү. *Кәңәшеп, эштең осон төйнәп ҡуйырға ине.* **Осон юғалтыу** 1) ниҙең дә булһа ыңғай-йын, бәйләнешен юғалтыу. *Һүҙҙең осон юғалтып, каушап ҡалыу;* 2) буталсыҡ, йәшерен эштең эҙен юғалтыу. **Осо сығыу** йәшерен берәй эштең сере асылыу, йөйө сығыу. *Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә, ти. Ҡасан булһа ла бер осо сығыр әле.* М. Тажи. **Ос һәнәге** *кар.* **һәнәк** 1. **Тел осонда ғына тороу** бик билдәле нәмә йәки һүҙ булып та, әйтәм тигәндә генә онотоп тороу. *Тағы ни генә бар ине һуң әле? Тел осонда ғына тора ла.* Ғ. Дәүләтшин. **Тырнаҡ** (*йәки* **энә**) **осондай** аҙ ғына, бәләкәй генә. *Энә осондайҙы тауҙай итеү. Тырнаҡ осондай ҙа ғәйебем юҡ.* **Шеш осона сығыу** *кар.* **шеш** [2].

**ОСА** *и.* **1.** Арт һан. *Хажиғәли асыуланып, тышау менән атының осаһына төшөрҙө.* Я. Хамматов. / Ултырыш. *[Йомабай:] Өс көн буйы һыбай йөрөп, осам ҡалманы.* С. Мифтахов. **Оса һөйәге** кәүҙәнең артҡы өлөшөндәге киң һөйәк. *Оса һөйәге һигеҙгүҙгә килеп ҡушыла.*

**2.** Ҡуй һарығының гел майҙан торған йыуан ҡойроғо. *Осалы ҡуй.* ■ *Ырымбур яғынан килтерелгән ҡаҙаҡ ҡуйының оса майы ус алаҡанындай итеп ҡырҡылған да, ҡулламаның өҫтөнә өймәләмә итеп һалынған.* Ғ. Дәүләтшин.

♦ **Кеше йығылғанға осаны ыуыу** *мыҫҡ.* кеше ҡайғыһын ҡайғы итеп ҡыланған кешене хуп күрмәй әйтелә.

**ОСАҒАС** *и.* Ел осормаһын өсөн кәбән, күбә башына һалына торған ағас.

**ОСА́ДА** [*рус.*] *и.* Ҡала йәки нығытманың баҫып алыу маҡсатында ҡоралл ғәскәр тарафынан ҡамалыуы; ҡамалыш. *25 августа Сталинград осада хәлендә тип иғлан ителде. 13 сентябрҙә дошман уны штурмлай башланы.* Ә. Ихсан.

**ОСА-ҠУНА** *р.* **1.** Ярһып, оса-оса ташланып. *Тауыҡтар оса-ҡуна суҡыша.*

**2.** *диал.* Оса-талпына.

**ОСАЛЫҠ** *и.* Ышлыяның һыртынан оса аша төшкән нәҙек ҡайыштар.

**ОСАН** *и. диал.* Эс төшөүе. *Осан булыу.*

**ОСАР** *с.* Оса торған, осоп йөрөгән. *Осар ҡош. Осар тейен.* ■ *Кеше ғүмере осар оскон ғына, бер ҡаҡлығыр тулҡын ни бары.* М. Уразаев.

**ОСАРЫМ**: **осарым тотошоу** *диал.* шыбаға тотошоу.

**ОСАРЫМЛАШЫУ** *к. диал.* Шыбаға тотошоу.

**ОСА-ТАЛПЫНА** *р.* Йөрәкһеп, елкенеп. *Оса-талпына Бәҙеғолъямал килеп кер[ҙе].* Х. Ғиләжев.

**ОСЕМЕНА́ТОР** [*рус.*] *и.* Малды яһалма юл менән аталандырыу эшендәге кеше. *Осеменатор булып эшләү.*

**ОСЕТИ́Н** *и.* Осетияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (иран телдәренең береһендә һөйләшә). *Осетин халҡы. Осетин кешеһе. Осетин теле.*

**ОСҠАЛАҠ** [1] *с.* **1.** Саҡ ҡына елгә лә осоп тороусан; бик еңел. *Осҡалаҡ ҡар.*

**2.** *күсм.* Тыныс тороп сыҙамай, осоп-төшөп тороусан; останлаҡ, сос. *Осҡалаҡ бала.* / Бер урында йәшәп сыҙамай, төрлө ергә йөрөп ятыусан. *[Сафура:] Был ниндәй ғүтыйғош .. Үҙе йәш кенә, үҙе Ҡырымын да, Азияһын да ҡалдырмаған. Урын һайлап йөрөгән осҡалаҡтыр әле бер.* Б. Бикбай.

**ОСҠАЛАҠ** [2] *и. диал.* Ҡырау болото.

**ОСҠАЛАҠ** [3] *и. диал. кар.* **ҡамҡа** [2].

**ОСҠА́ЛАУ** *к. диал.* Сыбаталау. *Осҡалап егеү.*

**ОСҠА́РТЫН** *р.* Еңел-елпе, арлы-бирле. *Осҡартын кейенеү. Осҡартын эшләү.* ■ *[Ҡарт] күп уйлап тормай, туралап ҡына атып ебәрә, уғы осҡартын китә* (Хикәйәттән).

**ОСҠАРЫ** *р. диал.* Яҡын. *Кәрәк нәмәне осҡары ғына тотоу.*

**ОСҠАТ** *и.* Аҡлы-аллы ваҡ ҡына сәскә атҡан, ҡыҙыллы-һарылы ҡушар-ҡушар емеш биргән, ҡубырсып торған аҡһыл ҡабыҡлы ҡыуаҡ ағасы.

**ОСҠАУ** *и. диал. кар.* **сыбата** 1. *Осҡауҙағы ат. Осҡауға егеү.*

**ОСҠАУЛАУ** *к. диал.* Сыбаталау. *[Сәйф] ҙур ҡашауайға пар ерәнде осҡаулап ектерҙе.* С. Агиш.

**ОСҠАУЫЛ** *и. диал. кар.* **сыбата 1.**

**ОСҠАУЫЛЛАУ** *к. диал.* Сыбаталау. *Старостаның ҡапҡа төбөнә ҙур повозкаға ат осҡауыллаған кеше килеп туҡтаны.* Ж. Кейекбаев.

**ОСҠОЛОҠ** *и.* Тамаҡтан ҡапыл-ҡапыл тотоп, сиҡ-сиҡ итеп сыҡҡан тауыш. *Осҡолоҡ тотоу. Осҡолоҡтан ҡотолоу.*

**ОСҠОЛОҠЛАУ** *к. диал.* Тамаҡ саҡырыу, сиҡылдау.

**ОСҠОН** [1] *и.* **1.** Осоп-сәсрәп торған бөртөк-бөртөк ут. *Осҡон сәсеү.* ■ *Тимерҙәр сүкелә, осҡондар оса.* Б. Бикбай. *Кеше ғүмере осар осҡон ғына.* М. Уразаев.

**2.** *күсм.* Янған һымаҡ ялтырап торған бәләкәй генә нөктә. *Мәзһарҙың аҙ ғына ҡыҫығыраҡ үткер ҡара күҙҙәрендә .. осҡондар ялтырай.* Ш. Насыров.

3. *күсм. ҡар.* **сатҡы** 2. *Өмөт осҡоно. Шатлыҡ осҡоно.* ■ *Бар Өфөмдә минең бер таныш йорт, шундай яҡын ул йорт күңелгә. Йәшлек осҡондары дөрләп китә, саттан боролоп уны күреүгә.* Р. Янбулатова.

♦ **[Баҫҡан ерҙә] осҡон сәсрәтеү** *шул уҡ* **ут сәсрәтеү** (*ҡар.* **ут**).

**ОСҠОН**[2] *с. диал.* Осҡор.

**ОСҠОНЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Осҡон барлыҡҡа килтереү.— *Яҡшы,— тине сержант, күҙен осҡонландырып.* Ә. Хәкимов.

**ОСҠОНЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Осҡон сығарыу, осороу. *Осҡонланып янған ут.*

**2.** Осҡон кеүек йылтылдау. *Аяҡ аҫтында ап-аҡ ҡар осҡонланып, шығырлап ята.* / *күсм.* Тоҡанып киткән һымаҡ, йылт итеү (күҙ ҡарашына ҡарата). *Мәҙинә осҡонланып торған зәңгәр күҙле .. бик сибәр ҡыҙ ине.* Х. Зарипов.

**ОСҠОР** *с.* **1.** Шәп осоусан; етеҙ. *Ҙур танктар, осҡор самолёттар эшләп бирер Ватан, күк Урал.* З. Биишева. *Аҡ ыласын тигән ай осҡор ҡош ҡош ҡундырмай ағас башына* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Осҡан кеүек шәп йөрөүсән; бик етеҙ. *Осҡор ат.* ■ *Поезд үҙенең осҡор аҙымдары менән алға бара.* Д. Юлтый. / Бик тиҙ үтеп, алыҫтарға етеүсән. *Осҡор уйҙар.* ■ *Уҙа осҡор йылдар.* Ғ. Хәйри.

**3.** *күсм.* Эш-тормошта бик булдыҡлы; зирәк, үткер. *Осҡор егет.* ■ *Батыр бул һин, һәүбәнем, осҡор бул һин, һәүбәнем.* «Аҡбуҙат».

**ОСҠОРҺАҠ** *и. диал.* Аҡһырғаҡ.

**ОСҠОС** *и. һөйл.* Самолёт. *Ә ауылда ауыр ауырыу булһа, осҡос килә, гөрләп күктәрҙә.* Р. Ниғмәти.

♦ **Осҡос балаҫ** әкиәт батырҙарын осороп йөрөтә торған тылсымлы балаҫ. *[Егет:] Минең осҡос балаҫым булмаһа, ҡайтып өлгөрә алмай инек, ҡыҙ күптән үлгән булыр ине* (Әкиәттән).

**ОСЛАЙТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ослайтыу.**

**ОСЛАЙТЫУ** *ҡ.* Ослоға әйләндереү, осло итеү. *Иренде ослайтыу.* ■ *.. Түшенә ленталар менән миҙалдар таҡҡан ҙур мыйыҡлы, эйәк аҫтында ослайтып ҡалдырған һаҡаллы кеше, мәсеттән сығып, ҡырандаҫҡа ултырҙы.* Д. Юлтый.

**ОСЛАЙЫУ** *ҡ.* Ослоға әйләнеү, осло булыу. *Ослайып сығыу. Ослайып тороу.* ■ *[Илшаттың] йәмшек танауы нәҙегәйеп, ослайып киткәндәй булған.* А. Ғирфанов.

**ОСЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ослау**[1]. *Осланған ҡәләм.*

**2.** Ослоға әйләнеү; ослайыу. *[Фатиманың] мороно оҙонайып, осланып киткән.* Б. Бикбай.

**3.** *күсм.* Аҙағына етеп, тамам булыу; тамамланыу. *Эш осланды.* ■ *Юл осланыр ... Ап-аҡ ҡарға ҡапланырҙар түбәләр.* М. Кәрим.

**4.** *күсм.* Юҡҡа сығыу, бөтөү. *[Борһанов:] Ослана икән гәзиз башҡайым!* И. Абдуллин.

**ОСЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ослау**[1].

**ОСЛАУ**[1] *ҡ.* **1.** Берәй нәмәнең башын нәҙеккә бөтөрөп, ос яһау; осло итеү. *Ҡаҙыҡ ослау. Ҡәләм ослау.* / Өҫкә ҡарай тар ғына итеп бөтөрөү; осло итеү. *Ҡыйыҡты ослау. Кәбәнде ослау.*

**2.** *күсм.* Аҙағына еткереп, тамамлау; бөтөрөү. *Уйҙы ослау. Һүҙҙе ослау. Эште ослау.* ■ *Әхмәҙулла бабай йырҙы .. ҡапыл ғына ослап ҡуйҙы.* Ә. Вахитов.

**3.** *күсм.* Юҡҡа сығарыу, юҡ итеү, бөтөрөү. *Ата малын ослау.* ■ *Инде бишбармағын ослап, һурпаһына еттек тигәндә, Ибрахан түҙмәне, һүҙ ҡуҙғатты.* А. Ғирфанов. *[Әбей — ҡыҙға:] Йөрөмә ул егет артынан, ул һине ослар* (Әкиәттән).

**4.** *диал. күсм.* Алдау, һемәйтеү.

♦ **Аяҡ ослап** *ҡар.* **аяҡ**[1] 1. **Ослап егеү** төптәге аттан алға сығарып егеү; осҡаулап егеү, сыбаталап егеү. *Ослап егелгән аттар.*

**ОСЛАУ**[2] *ҡ. диал.* Ҡул менән тотоу, ҡулға тотоу. *Тубыҡ батыр барып, әбейҙең ҡумыҙын ослаҡы* (Әкиәттән).

**ОСЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ослау**[1] 1. *Кәбән ослашыу.*

**ОСЛО** *с.* Нәп-нәҙек үткер булып торған башлы, сәнсеп торорлоҡ үткер. *Осло беҙ. Осло таяҡ.* ■ *[Егет] имән ҡырҡып уҡ яһаған, ул уҡтың башағына осло таш ҡуйған* (Әкиәттән). / Нәҙегәйеп барып бөткән. *Осло башлы итек.* ■ *«Юҡ, хәҙрәт,— тине Йәнтүрә,— беҙҙең хәҙерге йәштәр ҡыҫҡа буҫтау кейем, осло башлы бүрек кейеп йөрөргә ярата».* Ә. Усманов.

**ОСЛОҠ** *и. яңл. ҡар.* **аяҡ-ҡул.**

**О́СМИЙ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Химик элемент, ағалтын рудаһынан алына торған күкһел аҡ төҫтәге бик ҡаты металл.

**О́СМОС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. физ.* Иреткес матдәнең йоҡа ғына яры аша иретмәгә йәйләп үтеүе.

**ОСМОТ** *и.* **1.** Берәй нәмәнең бик бәләкәй өлөшө, бәләкәй генә киҫәге; остоҡ. *Кистән ыҙалатҡан ауыр тойғоларҙың осмото ла ҡалмаған.* З. Хисмәтуллин. *Тураған ит осмотон күреп, был беҙҙең кесе телгә лә йоҡмаҫ, тигәндәй, ике дуҫ бер-береһенә ҡарашып ҡуя.* «Алдар менән Зөһрә». / Ниҙеңдер иң һуңғы бик бәләкәй өлөшө. *Әлекке тормоштоң осмото.*

**2.** *күсм.* Бәлиғ булып ҡыланған бала-сағаны мыҫҡыллап әйтелә. *Егет осмото. Ҡыҙ осмото.*

**3.** *с. мәғ.* Бик бәләкәй. *Осмот ер.* // *[Сәйет — ҡатынына:] Һин, мал йыяйыҡ, тип ҡыҫтайһың, һин башҡаға осмот бошонмайһың.* С. Кулибай.

**ОСМО́ТР** [*рус.*] *и.* Эш-хәлдең барыш-торошон ҡарау өсөн яһалған күҙәтмә. *Осмотр үткәреү. Осмотр яһау.* ■ *Күп кеше 40 йәштән уҙғас, профилактик осмотр ваҡытында уҙҙәренең артериаль ҡан баҫымы күтәрелеүен белеп, гәжәпкә ҡала.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 30 ғинуар.

**ОСО-БАШЫ** *и. йыйн.* Ниҙеңдер аҙағы, сиге. *Осо-башы юҡ.*

**ОСОҠ**[1] *и.* Сихырҙың бер төрө (хөрәфәт буйынса, ауырыуҙы ҡасырыу өсөн ҡурсаҡ яһап йәки башҡа бер нәмә алып: «Осоҡ булһаң, осоп кит, тауҙан килһәң, тауға кит, таштан килһәң, ташҡа кит, ҡайҙан килһәң, шунда кит, был бахырҙа ниең бар, яр аҫтында өйөң бар»,— тигән һамаҡ әйтемләп, ҡырға сығарып ташлайҙар; кем ошо ташлаған нәмәне таба, ауырыу шул кешегә китә, йәнәһе). / Сихырлап ташлаған шул нәмә. *Осоҡтан ҡасыу. Осоҡ яһап ташлау.*

♦ **Осоҡ һуғылыу** осоҡланған нәмәне алып, ауырыуға әйләнеү.

**ОСОҠ** [2] *и.* **1.** Тарының һурҙырғанда сыҡҡан көбө.

**2.** *диал.* Кәбәк. *Ашлыҡ елгәргәндә осоҡ шаян елгә китте осоп.* С. Иманғолов.

**ОСОҠ** [3] *с.* **1.** Эсе буш, емһеҙ, ас; *киреһе* **тос.** *Осоҡ ашлыҡ. Осоҡ орлоҡ.*

**2.** *күсм.* Еңел эстәлекле, мәғәнәһеҙ, буш. *Осоҡ кеше. Осоҡ булыу.*

**3.** *һөйл.* Үҙе ҙур һәм бик еңел. *Мендәрем осоҡ ҡына.*

**4.** *күсм.* Ырғып-һикереп торған еңел хәрәкәтле; остоҡай. *Осоҡ ҡыҙ.*

**ОСОҠЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **осоҡлау** 1.

**2.** Тослоҡто юғалтыу, еңелгә әйләнеү; еңеләйеү. *Ауырыуҙан осоҡланып ҡалыу.*

**3.** *күсм.* Еңел аҡыл, еңел холоҡ күрһәтеү. *[Ауылдың] Низами кеүек карттары, Бәхтиәр кеүек һәтәүҙәре осоҡланып, боронғо донъя булды тип һикерешәләр.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**ОСОҠЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **осоҡлау** 1.

**ОСОҠЛАУ** *ҡ.* **1.** Хөрәфәт буйынса, ауырыуҙы ҡасырыу өсөн берәй нәмәне сихырлап ташлау. *Сөйәл осоҡлау.*

**2.** *күсм.* Туҡмау. *[Старшина], осоҡлап алығыҙ булмаһа, йәненә көс килһә, әйтмәй булдыра алмаҫ, тип бөтөүгә .. кемдәрҙер аунап ятҡан Түрәбайҙың өҫтөндә бейей башланы.* Т. Хәйбуллин.

**ОСОҠСО** *и.* Осоҡ эшләүсе; имсе.

**ОСО-ҠЫРЫЙЫ** *и. йыйн.* **осо ла ҡырыйы ла** Ниҙеңдер аҙағы, сиге; осо-башы. *Алдымда киң һәм тигеҙ ялан. Уның осо-ҡырыйы күренмәй.* Ә. Чаныш.

**ОСОНДОРОУ** *ҡ.* Урынһыҙ маҡтап, маһайтыу; һауаландырыу. *Осондороп ебәреү.*

**ОСОНМА** *с. диал.* Ҡапыл ҡыҙып, тоҡанып китеүсән.

**ОСОНОП-ТАЛПЫНЫУ** *ҡ.* Елкенеү; осоп-төшөү. *Осоноп-талпынып өйгә ҡайтыу.*

**ОСОНОУ** [1] *ҡ.* Етеҙ-етеҙ төрлө яҡҡа осоу. *[Ваҡ коштар] сутылдаша-сутылдаша осоноп һикереш[ә].* Ҡ. Даян.

**ОСОНОУ** [2] *ҡ.* **1.** Иркәләнеп йәки шашып, ҡылансыҡланыу. *[Беҙголаҡ] әсәһенә .. һыйына, осоноп китеп, атаһының алдына арҡыры төшә.* Р. Ғабдрахманов.

**2.** Елкенеп ҡайҙалыр ынтылыу; ашҡыныу. *Күңелем осона.* ■ *[Ғәйшә:] Кем ҡайҙа ҡоторта — шунда осонһа, һуң ул ниндәй бала.* С. Кулибай.

**3.** Ниндәйҙер дәрт, шатлыҡ, хыял кеүек нәмәнән елкенеү. *Элек йәш балалар кеүек осоноп, ҡыуанып йөрөгән Байрамбикә хәҙер бөтөнләй баҫылды.* Ш. Шәһәр. *Осоноп-осоноп, өҙөлөп-өҙөлөп, ашҡынып шатлыҡ көтәм.* Ш. Бабич.

**4.** Юҡ ҡына нәмәгә маһайыу; һауаланыу. *Ул [Рауил] аҙыраҡ осона торған малай булһа ла, алдаша торған гәҙәте юҡ.* С. Агиш.

**5.** *күсм.* Шашып, боҙолоу; аҙыу (ауырыу, йәрәхәткә ҡарата). *Йәрәхәт табыш түгел, туғанкайым, күп кеше үлтерер осонғандан.* Аҡмулла.

● *Осонғандың ҡулынан ҡуян ысҡынған.* Мәҡәл.

**ОСОНОУ** [3] *ҡ.* Бөрсөк-бөрсөк ҡабарыу; сабыртыу (ауыҙ, ирендәрҙе һ. б.). *Ауыҙы осонған. Ирене осонған. Теле осонған.*

**ОСОНСОҠ** *с. диал.* Остоҡай.

**ОСОП-ҠУНЫУ** *ҡ.* Ярһып-ярһып ташланыу. *Һүҙ әйтер хәл юҡ, осоп-ҡуныр бара.*

**ОСОП-ТӨШӨҮ** *ҡ.* Шатлыҡ, теләк менән елкенеү. *Уйын тиһәң — осоп-төшөп тора.*

**ОСОП-ҺИКЕРЕҮ** *ҡ.* Ниндәйҙер тойғонан елкенеү. *Күбәләк кеүек осоп-һикереп торҙо Зөлхизә.* З. Биишева.

**ОСОР** [1] *и.* **1.** Ниндәйҙер үҙенсәлектәрҙе, төрлө хәлдәрҙе үҙ эсенә алған билдәле бер ваҡыт араһы. *Төҙөлөш өсөн уңайлы осор. Яуаплы осор. Вегетация осоро. Инкубация осоро. Навигация осоро.* ■ *Үттек инде еңел-елпе йәшәр осорҙо.* М. Кәрим.

**2.** Билдәле тарих өҙөгөн эсенә алған ваҡыт араһы; дәүер. *Капитализм осоро. Социализм осоро.*

**3.** *геол.* Билдәле бер геологик системаның тау ҡатламдары барлыҡҡа килгән ваҡыт эраһы. *Палеозой эраһының ташкүмер осоро.*

♦ **Ошо осорҙа** ошо яҡын (үткән һәм киләсәк) ваҡыт эсендә; ошо арала. *Ошо осорҙа китермен тигәйнем.*

**ОСОР** [2] *с. диал. ҡар.* **сор** [1].

**ОСОРҒАУ** *ҡ. диал. ҡар.* **ырғытыу** 2. *Дейеү бәрейенең малайы 60 ботло сукмарҙы осорғап ебәрҙе* (Әкиәттән).

**ОСОРҒОС** *и.* Ҡағыҙ йәки сепрәк менән көпләп, ҡойороҡлап яһалған дүрткел уйынсыҡ (оҙон еп тағып, һауаға осороп уйнайҙар). *Ҡағыҙ осорғос.* ■ *Малайҙар осорғос тотоп ҡыумайҙар иҫкән елде. Улар хәҙер мәктәптәрҙә һабаҡ өйрәнә инде.* М. Сөндөклө.

**ОСОРҘАШ** *и. ҡар.* **замандаш.**

**ОСОРМА** [1] *и.* **1.** Келәт ишеге өҫтөндәге бүрәнәне тышҡа тартараҡ бурап яһаған һикәлтә (төрлө нәмә һалыу өсөн). *[Бабайҙың] яҙ көнө .. алып ҡайтҡан сүкеше осормала ғына ята ине.* Р. Ғабдрахманов. / Өйҙөң иң өҫкө бүрәнәһе менән ҡыйыҡ сите араһынан буйҙан-буй киткән ҡыуышлыҡ.

**2.** *диал.* Бүртлек, сарлаҡ. *Осормаларға менеп, мөрйә кирбестәрен һүтеп төштөк.* Ғ. Әмири.

**ОСОРМА** [2] *и.* Текә булып ҡолап төшкән бейек тау-таш. // *Осорма яр.* ■ *Абдулла осорма ҡаянан һаҡлыҡ менән генә .. [түбәнгә] ыңғайланы.* Н. Мусин.

**ОСОРОУ** *ҡ.* **1.** Осорға ирек ҡуйыу. *[Егет] .. күкәйҙе ватып, эсенән энәһен ала, йәнә йолҡолоп бөткән өйрәктең үҙен осороп ебәрә* (Әкиәттән).

**2.** Ниҙелер һауаға күтәреп осоу. *Дейеү осороп алып китәм тигәндә генә Ҡамыр батыр сукмары менән уны быркырата һуғып ташлаған* (Әкиәттән).

**3.** Ҡурҡытып, өшкөтөп, осорға мәжбүр итеү. *Иртә менән тороп ҡыскырҙым, былбыл балаларын осорҙом* (Халыҡ йырынан).

**4.** *күсм.* Бик шәп итеп алып барыу; елдереү. *[Мөстәҡим ҡарт:] Бригадирҙың бурылын еккәйнем. Оскон бит бахырың, осора ғына.* С. Кулибай.

**5.** *һөйл.* Бейек ерҙән аҫҡа ҡолатыу. *[Биктимер] атын бер ярлауға төртөп осормаҡсы була* (Әкиәттән). / *күсм.* Вазифалы урындан алыу;

төшөрөү. — *Малсылар араһында котко тарата, тигән һылтау менән ферма мөдирлегенән мине осорҙолар.* Д. Исламов.

**6.** *күсм.* Йығылырға мәжбүр итеү, көс менән колатыу. *Бәреп осороу. Тибеп осороу. Төртөп осороу. Һуғып осороу.* ■ *Дейеү әбей менән бабайҙы осора тибеп ебәргән, ти* (Әкиәттән).

**7.** *күсм.* Һатып ебәреү. *[Хәлфетдин:] Беҙҙә Урманаев тигән лесник бар. Әҙәм түгел. Өй һала ла осора, өй һала ла осора.* С. Кулибай. / Касырып, юк итеү. *Бәхетте осороу.*

♦ **Бала осороу** баланы осорға өйрәтеү (коштарға карата). *Сыйырсыктар балаларын осорҙолар кисә.* Н. Нәжми. **Баштан себен осороу** *кар.* **баш. Буш кыуык осороу** *кар.* **кыуык. Күлөн күккә осороу** *кар.* **күл. Канат осороу** *кар.* **канат. Сүп осороу** *кар.* **сүп** [1].

● *Кошон осорған күккә карар, куйын юғалткан ергә карар.* Әйтем. *Хәйерсенекен ел осорған.* Әйтем.

**ОСОРТМА** *с. диал.* Һепертмә.

**ОСОРТОУ** *к.* **1.** *кар.* **осороу.** *Осортоп алып барыу.*

**2.** Әләктереп, урлап, алып касыу. *[Нигмәтулла — Хәйретдингә:] Үҙең миңә катнашмаһаң, атыңды биреп тор, мин күрше ауылдан бер нәмә осортайым.* Я. Хамматов.

**ОСО-СИГЕ** *и. йыйн. кар.* **осо-кырыйы.** *Сәгиҙә лә осо-сиге күренмәгән уйҙарға сумды.* М. Тажи.

**ОСОУ** *к.* **1.** Һауаға күтәрелеп, хәрәкәт итеү. *Осоп менеү. Һауала осоу.* ■ *Баш осонда аэропландар өҙлөкһөҙ оса.* Д. Юлтый. / Оскос йә башка нәмә ярҙамында һауала йөрөү. *Әбей болотка уранып, баш тарткан якка осоп киткән, ти* (Әкиәттән).

**2.** Ниндәйҙер этәргес көс менән күтәрелеп, хәрәкәт итеү. *Выжлап оскан туп ярсыктары гөпөлдәп ергә төшә башланы.* Д. Юлтый. *Ак оскондар күккә осалар.* Ғ. Амантай. *Көрпөлдәп яткан яңы көл елгә осоп, ауыҙға, танауға, күҙгә тула.* Ғ. Дәүләтшин. / Еңеллек аркаһында күтәрелеү. *Төтөн һауаға оса.*

**3.** Быуға әйләнеп таралыу. *Хушбый осоп бөткән.*

**4.** *күсм.* Бик шәп итеп барыу; елеү. *Каскын камсыһын һелтәп ебәргән, бурыл уларҙы алып оскан.* Н. Иҙелбай. *Ат ярһыған. Сана оса.* М. Кәрим. / Бик тиҙ үтеү (вакытка карата). *Гөрләшеп дәртле минуттар остолар моңдар менән.* Ш. Бабич.

**5.** *һөйл.* Бейек ерҙән аҫка колау; йығылыу. *Өй башынан осоу. Ярҙан осоу.* / *күсм.* Вазифанан, эштән алыныу; төшөү. *[Тәуфикка:] Бының өсөн башыңдан һыйпамаҫтар! Урыныңдан осканыңды белмәй ҙә калырһың.* С. Кулибай.

**6.** *күсм. һөйл.* Булған урындан юк булыу; урланыу. *[Бәҙри:] Беҙҙең ике кәбән бесән кайҙа осто икән?* Б. Бикбай.

♦ **Елгә осоу** *кар.* **ел. Ел һымак осоу, канатһыҙ осоу** *йәки* **кош кеүек осоу** бик шәп, етеҙ барыу; елеү. **Йоко осоу** йоклау теләге бөтөү; йоко касыу. *Уның [Зөбәйҙең] йокоһо оскан. Ул караүатта әйләнә лә тулғана.* Ж. Кейекбаев. **[Күлө] күккә осоу** юкка сығыу, кыйралыу. *Шартланы миллионщик, күлө күккә осто.* Б. Бикбай. **Күбәләк кеүек осоу** еңел, етеҙ атлау. *Мәрйәм күбәләк кеүек осоп, минең эргәгә килде.* Д. Юлтый. **Кобара осоу** *кар.* **кобара.** *Куркышынан кобараһы оскан бай йүгерә-атлай өйөнә кайта* (Әкиәттән). **Кот оскос** *кар.* **кот. Кот осоу** *кар.* **кот. Оскан коштай** бик етеҙ, бик шәп. *Батыр егет кара айғырҙы менеп, оскан коштай елеп. Урал тауҙарына кайтты, ти* (Әкиәттән). **Осоп йөрөү** дәртләнеп, елкенеп йөрөү. *Үҙе лә шат хәҙер. Осоп .. йөрөй.* Ғ. Ибраһимов. **Осоп төшөү** бик нык шатланыу. *Ғәмилә, Хәмәтте күргәс, осоп төштө.* Б. Бикбай.

**ОСОУСЫ** *и.* Самолёт йөрөтөүсе; лётчик.

**ОСОШ** *и.* **1.** Нимәнеңдер һауала бер урындан икенсе урынға күсеү хәрәкәте, осоуы. *Коштарҙың осош картаһы. Лётчиктың осош картаһы. Күп осош яһау.* ■ *Иртәгә осоштар дауам итә.* А. Мағазов.

**2.** *күсм.* Илһамланып башкарылған ижади эш. *Шагир Рауил Бикбаевтың «Автобиография» китабы .. уның ҙур ижади осошо булды.* Ә. Вахитов.

**ОСРАК** *и.* **1.** Ниҙеңдер булыу-булмауы менән билдәләнгән күренеш. *Тәртипте боҙоу осрактары.*

**2.** Ниҙеңдер булыу-булмауынан барлыкка килгән хәл. *Уңайлы осрак. Был осракта. Күп осракта. Кайһы бер осракта.*

**ОСРАКЛЫ** *с.* **1.** Көтмәгәндә, уйламағанда булған. *Ослаклы танышлык. Осраклы эш.*

**2.** Ниндәйҙер сәбәп менән нығытылмаған, тейешле нигеҙе булмаған. *Осраклы хәл. Осраклы рәүештә еңеү.* ■ *[Дауыт Юлтыйҙың] исемен әйтеү менән үк, беҙҙә экиәтсе, кобайырсы карттарға ебәрҙеләр. Был шулай ук осраклы нәмә түгел ине.* К. Мәргән.

**ОСРАКЛЫК** *и.* **1.** Көтмәгәндә, уйламағанда килеп сыккан хәл. *Емеш үҙен ниндәйҙер бер осраклык аркаһында батша һарайына барып ингән йәтим кыҙ кеүек тойҙо.* З. Биишева.

**2.** Булырға ла, булмаҫка ла мөмкин булған хәл йәки күренеш.

**ОСРАЛЫУ** *к. эйһ. ф. кар.* **осрау.** *Кәрәкмәгән кешегә осралды.*

**ОСРАТЫУ** *к.* Тап итеп күреү. *Юлда осратыу.* ■ *Боролоуым булды — Йәнтимерҙе осраттым.* С. Агиш. *[Әткол:] Кунак итмәгәс, ул ни эшкә ярай. Һеҙҙе былай итеп кайҙа осратаһың.* Ғ. Дәүләтшин. *Оло юл буйында улар йәнә бер батырҙы осраткан* (Әкиәттән). *Былар бер генә кош та, бер йәнлек тә осратманылар, ти* (Әкиәттән). / Тормош юлында, донъяла күреү, белеү. *Ун һигеҙгә еткәнсә, күп һунарсы осраттым.* «Акбуҙат».

**ОСРАУ** *к.* **1.** Китеп барғанда, юлда кемгә йәки нәмәгә тап булыу; тура килеү. *Каршы осрау.* ■ *Бара торгас, быға [байға] бер карт осраны* (Әкиәттән).

**2.** Тормошта, донъяла күреү, белеү. *[Карт:] Кырк йыл курай тартып йөрөп, бындай йырсыға осрағаным юк ине.* Һ. Дәүләтшина. / Кайҙалыр тап килеп, күҙгә күренеү. *[Индрил:] Хәҙер лавкаға барам. Ниндәй якшы нәмә осрай, шуларҙы алам.* Д. Юлтый.

**3.** Ниндәйҙер хәл-вакиғаға дусар булыу; юлығыу. *Ауыр хәлгә осрау. Бәләгә осрау. Уңыш-*

*һыҙлыкка осрау. Һәләкәткә осрау.* ■ *Әбей бик каты буранға осрап, аҙашкан* (Әкиәттән).

● *Ауырһынған аҙапка осраған.* Мәҡәл. *Һайланған һаҙға, осраған таҙға.* Мәҡәл.

**ОСРАШТЫРЫУ** *к.* Осрашырға мәжбүр итеү. *Күптәрҙе бит йырҙар осраштыра, йыр менән дуҫ, иптәш табыла.* Н. Нәжми.

**ОСРАШЫУ** [1] *к.* **1.** Үҙ-ара ҡаршы килешеү; тап булышыу. *Ҡара-ҡаршы осрашыу.* ■ *Егерме йыл уҙғас, икәү бергә осраштылар юлдар сатында.* К. Кинйәбулатова. / Ҡайҙалыр тап килешеү, күрешеү. *Фронтта кеше кем менән генә осрашмай.* З. Биишева. *Театрҙа Йәнтимер менән осрашманым.* С. Агиш.

**2.** Тормошта, хеҙмәт юлында ниндәйҙер хәл, ваҡиғаға тап булыу. *Ғәҙелһеҙлек менән осрашыу. Яңылыҡ менән осрашыу.*

**3.** Бергә ваҡыт үткәреү, аралашыу, эш һ. б. тураһында һөйләшеү өсөн күрешеү. *Ленин Өфө марксистары менән осрашырға ынтылған.* «Совет Башҡортостаны», 1964, 23 ғинуар.

**4.** *һөйл.* Һөйөшөп, ваҡыт-ваҡыт күрешеп йөрөү. *Зөлхизә йән һөйгәне Зөлкәрнәй менән .. осрашыу көнөн түҙемһеҙлек менән көткән.* Н. Иҙелбай. *Йәшерәк сакта йәйләүҙә осраша торғайныҡ, хәҙер .. осрашмағанға күп йылдар булып китте.* Һ. Дәүләтшина.

**ОСРАШЫУ** [2] *и.* Билдәле бер кешене күреү, уның менән танышыу өсөн ойошторолған йыйылыш. *Осрашыу кисәһе. Осрашыу үткәреү. Осрашыуҙа сығыш яһау.*

**ОСТАҘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк.* Дәрес биреп, һабаҡ өйрәткән кеше; уҡытыусы. *Остаҙҙан һабаҡ алмайынса ғалим булмайҙар.* М. Өмөтбаев.

**2.** Ҙур эше, ғилеме йәки оҫталығы менән башҡаларға тәьҫир иткән, эйәрткән кеше.

● *Һәр ғилемгә остаҙ кәрәк.* Мәҡәл.

**ОСТАЛЫУ** *к. диал.* Алданыу.

**ОСТАНЛАҠ** *с.* Тик тормаҫ. *Останлаҡ ҡыҙ.*

**ОСТАНЛАУ** *к.* Тик тормау. *Ауыҙ-мороноң останлап, һүҫсән булма, киленсәк* (Сеңләүҙән).

**ОСТАУ** [1] *к. диал.* Тотоу. *Ҡулдан остау. Остап алыу.*

**ОСТАУ** [2] *к. диал.* Алдау. *[Солтанғәле:] Ике рәт останы мине, шуға асыуландым.* Я. Хамматов.

**ОСТО-КӨЙҘӨ** *р. һөйл.* Хәбәрһеҙ, хәбәрһеҙ-хәтерһеҙ. *Осто-көйҙө юк булыу.* ■ *Ошо китеүҙән Ғөбәйҙулла осто-көйҙө ғәйеп булды.* Р. Солтангәрәев.

**ОСТОҠ** [1] *и.* Ниҙеңдер бик бәләкәй өлөшө, бик бәләкәй киҫәге; осмот. *Бер остоҡ. Болот остоғо. Икмәк остоғо. Ҡағыҙ остоғо.* ■ *Ватаныма, остоҡ ҡына булһын, хеҙмәттәрем минең бармы икән?* Ғ. Ғүмәр. / *күсм.* Ниҙеңдер иң һуңғы бик бәләкәй өлөшө. *Иҫке донъяның остоғон ғына күр[ҙек].* «Совет Башҡортостаны», 1967, 30 май. **Бармаҡ остоғондай** бик тә бәләкәй; бармаҡ башындай. *Бармаҡ остоғондай ҙа ғәйебе юҡ.* / *мыҫҡ.* Кемдең йәки нимәнеңдер тулы мәғәнәгә эйә булмаған, исем өсөн генә иҫәпкә индерелгән бәләкәй вәкиле; йорат. *Ир остоғо. Ҡыҙ остоғо.*

**ОСТОҠ** [2] *с. диал.* Остоҡай.

**ОСТОҠАЙ** *с.* **1.** Һәр нәмәгә ҡыҫылып, һикереп-төшөп тороусан; тик тормаҫ, останлаҡ. *Хәмәт .. әйтергә лә өлгөрмәне, остоҡай Ғәмилә йүгереп сығып та китте.* Б. Бикбай.

**2.** Күҙе, башы уйнаҡлап, кеше алдында ҡыйшанлап тороусан (ҡатын-ҡыҙға ҡарата). *Ҡыҙрас та тик ултырмай: — Гөлкәй-көлкәй! Остоҡай! .. Маҡтансыҡ! — тип яуаплаша.* З. Биишева.

**3.** *диал.* Һүҙ күтәрмәй ҡаршы әйтешеп бара торған (ҡатын-ҡыҙға ҡарата).

**ОСТОҠАЙЛАНЫУ** *к.* **1.** Һәр нәмәгә ҡыҫылып, һикереп-төшөп тороу. *Остоҡайланып йөрөү.*

**2.** Ҡылансыҡланып, кеше алдында ҡыйшанлау; ҡыйпысыҡланыу.

**ОСТОҠЛАНЫУ** *к. диал.* Остоҡайланыу.

**ОСТОҠ-МОСТОҠ** *и. кәмһ.* Ниҙең дә булһа эшкә ашмаған киҫәк-миҫәк ҡалдығы.

**ОСТО-ОСТО** *и.* Бәләкәйерәк балалар уйнай торған яҙғы уйын (балалар түңәрәккә теҙелә; уйындың уҙаманы уртаға сығып: «Осто-осто ҡарғалар осто! Осто-осто торналар осто!» — тип тиҙ-тиҙ ҡысҡырып, ҡулдарын күтәрә; уның артынан бөтәһе лә ҡулын күтәрергә тейеш; шунан уҙаман ҡапыл: «Осто-осто, арбалар осто!» — тип, осмай торған нәмәнең исемен әйтә; шунда берәү яңылышып, ҡулын күтәрһә, фантик алалар; фантик күбәйгәс, уны «һаталар», йәғни күмәк теләк буйынса фантик эйәһен бейетәләр, йырлаталар йә башҡа нәмә эшләтәләр).

**ОСТРО́Г** [*рус.*] *и.* **1.** 14—17 быуаттарҙа Мәскәү дәүләтенең сиктәрендә нығытма булып хеҙмәт иткән ағас ҡоймалы ауыл йәки ҡала; ҡәлғә.

**2.** *иҫк.* Төрмә. *[Судья — Әхмәҙиғә:] Уғырлыҡ бит был! Һине бының өсөн острогҡа яптырыу кәрәк ине асылда.* Ж. Кейекбаев.

**ОСТЯК** *и.* Ханттарҙың иҫкергән атамаһы.

**ОСҺОҘ** *с.* **1.** Хаҡы бәләкәй; арзан; *киреһе* ҡыйбат. *Осһоҙ тауар. Осһоҙ хаҡ. // Осһоҙға төшөү.*

**2.** *күсм.* Ҡиммәте бәләкәй; әһәмиәтһеҙ. *Осһоҙ хәбәр. Осһоҙ хәҡикәт.*

● *Осһоҙҙоң һурпаһы ла татһыҙ.* Әйтем.

**ОСҺОҘАЙТЫУ** *к.* Хаҡын төшөрөү, арзанырыҡ итеү.

**ОСҺОҘАЙЫУ** *к.* Хаҡы төшөү, арзанайыу.

**ОСҺОҘ-ҠЫРЫЙҺЫҘ** *с.* Осо ла, сиге лә юҡ йәки күренмәҫ. *Осһоҙ-ҡырыйһыҙ матур ялан, ул йомшаҡ ҡарҙан юрған ябынған.* Н. Иҙелбай.

**ОСҺОҘЛАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Хаҡын төшөрөү, арзанайтыу. *Скважиналар короуҙың үҙ ҡиммәтен кәметеү нефть һәм газды осһоҙландырыу .. сығанағы булып тора.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 14 декабрь.

**2.** *күсм.* Баһаһын, ҡиммәтен, әһәмиәтен кәметеү. *Һүҙҙе осһоҙландырыу.*

**ОСҺОҘЛАНЫУ** *к.* **1.** Хаҡы төшөү, арзанайыу.

**2.** *күсм.* Баһаһы, ҡиммәте, әһәмиәте кәмеү.

**ОҪҠОЛОҠ** *и. иҫк.* Мал һатырға бирелгән рөхсәт ҡағыҙы.

**ОҪҠОН** *и.*, **оҫҡон йыуаһы** Тау битләүҙәрендә үҫә торған ҡамыш һабаҡлы эре әсе йыуа; ҡырағай һарымсаҡ. *[Ҡыҙҙар:] Оҫҡонло тауы ошо ул. Уның түбәһендә оҫҡон тигән тау йыуаһы үҫә. Үт кеүек әсе. Ауыҙҙы өтөп ала.* З. Биишева.

**ОҪҠОНОШ** *и. диал.* Оҫҡон.

**ОҪҠОТОУ** *к. диал.* Ойоҡһотоу.

**ОҪОЛ** *и.* Эштәге оҫталыҡ; тиҙ генә, йәтеш кенә итеп, килештереп эшләү һәләтлеге. *Оҫол күрһәтеү. Оҫол менән эшләү.*

**ОҪОЛЛАНЫУ** *к.* Эшкә оҫтарыу; йәтеш, килешле итеп эшләргә өйрәнеү.

**ОҪОЛЛО** *с.* Эшкә оҫта; йәтеш итеп, яйына килтереп эшләй белеүсән. *Егет бик оҫолло, ҡулдары килешеп тора.*

**ОҪОЛҺОҘ** *с.* Эшкә йәтешһеҙ, һәләтһеҙ. *Оҫолһоҙ кеше.*

**ОҪТА** [*фарс.* 〈 *ғәр.*] I *и.* **1.** Ниндәй ҙә булһа эште, һөнәрҙе бик яҡшы башҡарған кеше; һөнәр эйәһе. *Ул үҙ эшенең оҫтаһы. Балта оҫтаһы.*

**2.** Ниндәйҙер эштең белгесе. *Сәнғәт оҫтаһы.* ■ *Электр һүнгәйне, оҫтаһы килеп, йүнәтеп китте.* Н. Ҡәрип.

**3.** (*йәки* **балта оҫтаһы**) Йорт бурау, йорт төҙөү һөнәренә эйә булған кеше. *[Булат:] Атайым оҫта ла булған, ферманы ла ул төҙөгән.* К. Кинйәбулатова. *Мәктәп .. һалышып йөрөй торғас, саҡ ҡына балта оҫтаһы булып китмәнем.* С. Кулибай.

II *с.* **1.** Берәй эште, һөнәрҙе еренә еткереп башҡара белеүсән. *Оҫта йырсы. Оҫта тимерсе. // Ҡурайҙа оҫта уйнау. Оҫта эшләү.* ■ *Бер һунарсы йәшәгән, ти. Бик оҫта булған, ти.., ауламаған йәнлеге, атмаған ҡошо ҡалмаған, ти* (Әкиәттән). / Ниндәйҙер эште бик яҡшы итеп башҡарыуға һәләтле. *Оҫта ҡул(лы). Оҫта тел(ле). Аш-һыуға оҫта. Йырға оҫта. Телгә оҫта. Эшкә оҫта.* ■ *[Гәрәй — Сәғиткә:] Һин ике ҡәләмгә лә оҫта бит. Һине беҙ табельщик итәбеҙ.* А. Таһиров.

**2.** Бик яҡшы итеп, килештереп башҡарылған. *Оҫта итеп һөйләү.* ■ *Апай төрттөрә биреп .. ҡуйҙы. Бер егет уға оҫта ғына яуап та тапты.* Р. Солтангәрәев.

● *Оҫта барҙа ҡулың тый, сәсән барҙа телең тый.* Әйтем. *Эш оҫтанан ҡурҡа.* Әйтем.

**ОҪТАБИКӘ** *и. иҫк.* Дин әһелдәренең ҡатыны. *Хәҙрәттең оҫтабикәһе.* ■ *Мин тәү башлап үҙебеҙҙең ауылдың Вәли мулла оҫтабикәһенә уҡырға йөрөнөм.* Т. Йәнәби.

**ОҪТАЛАП** *р.* Оҫталыҡ һалып, оҫталыҡ менән, оҫта итеп. *Оҫталап тегеү.*

**ОҪТАЛЫҠ** *и.* Эш-һөнәргә булған һәләтлелек. *Әҙәби оҫталыҡ. Актёр оҫталығы. Һүҙ оҫталығы. Оҫталыҡҡа эйә булыу.*

**ОҪТАРЫУ** *к.* Эш-һөнәрҙе оҫта башҡарыу һәләтенә өлгәшеү. *Телгә оҫтарыу. Эшкә оҫтарыу.* ■ *Морат уҡырға инмәҫ элек үк һүрәт төшөрөргә ярата ине. Ә хәҙер бигерәк оҫтарып китте.* И. Нигмәтуллин. *Атламаһаң, юлдар ҡыҫҡармай. Эшләмәһең, ҡулдар оҫтармай.* С. Ҡудаш.

**ОҪТОРА** *и. иҫк. йыйн.* Ҡырыныу кәрәк-ярағы.

**ОТАРИД** [*ғәр.*] (*баш хәреф менән*) *и.* Ҡояшҡа иң яҡын торған планета; Меркурий.

**ОТАРЛАУ** *к. иҫк.* Анализ яһау, анализ үткәреү.

**ОТБÓЙ** [*рус.*] *и.* Бер эш-хәлдең бөткәнен белдергән хәрби сигнал. *Отбой белдереү. Отбой уйнау.*

**ОТВÁЛ** [*рус.*] *һөйл. и.* Ҡаҙылма байлыҡ сығарғанда буш тау тоҡомдарын түккән ерҙә барлыҡҡа килгән өйөм. *Буш тоҡомдарҙы отвалға өйөү.*

**ОТВЁРТКА** [*рус.*] *и.* Винт һәм шөрөп бора торған ҡорал.

**ОТГУ́Л** [*рус.*] *и.* Эш сәғәтенән тыш эшләнгән ваҡыт иҫәбенә бирелә торған өҫтәмә ял. *Отгул алыу. Отгул биреү. Отгулда йөрөү.*

**ОТДЕЛЕ́НИЕ** [*рус.*] *и.* Иң түбәнге хәрби подразделение, взводтың бер өлөшө. *Уҡсылар отделениеһы. Отделение командиры.* ■ .. *Ротаның взвод һәм отделениеларын барлап бөткәс, мин янған бер өйҙөң дворына индем.* С. Кулибай.

**ОТÉЛЬ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Ҡунаҡхана.

**ÓТЗЫВ** [*рус.*] *и.* Фән, әҙәбиәт, сәнғәт әҫәрҙәренә йәки башҡа нәмәгә бирелгән ҡыҫҡаса баһа. *Отзыв алыу. Отзыв биреү.*

**ÓТКЛИК** [*рус.*] *и.* Берәй хәл-ваҡиғаға ҡарата матбуғат аша белдерелгән фекер. *Отклик табыу.* ■ *Башҡорт совет яҙыусылары был ҙур политик ваҡиғаларға үҙҙәренең әҫәрҙәре менән отклик яһанылар.* Ә. Харисов.

**ОТКРЫ́ТКА** [*рус.*] *и.* **1.** Хат яҙыу өсөн ҡулланылған махсус почта карточкаһы. *Открытка ебәреү.*

**2.** Шул уҡ ҙурлыҡтағы һүрәтле карточка.

**ÓТКУП** [*рус.*] *и. кар.* **йолом.**

**ОТҠАРЫУ** *к. диал.* Оттороу.

**ОТҠО** *и.* Нимәгәлер ҡаршы алып барылған аҫтыртын һүҙ; ҡотҡо. *Отҡо һалыу [биреү]. Отҡо алып барыу.* ■ *[Әхәт:] — Берҙәм хужалыҡҡа ҡаршы яман уй менән отҡо таратыусыларға беҙҙең эшебеҙ, уңышыбыҙ үҙе яуап бирә.* З. Биишева.

**ОТҠОР** *с.* Тиҙ үк аңлап алыусан; зирәк. *Отҡор бала. Отҡор булыу.*

**ОТҠОРЛОҠ** *и.* Тиҙ аңлау мөмкинлеге; зирәклек.

**ОТҠОСО** *и.* Отҡо таратыусы.

**ОТҠОТОУ** *к. йөкм. кар.* **отҡоу.**

**ОТҠОУ** *к.* Өгөтләп, ниндәйҙер эш-хәрәкәткә әтеү; ҡотортоу. *Айбикәне отҡоп сығарып алдыҡ та, яҡшылап тороп Ҡотлоярҙы судҡа бирҙек.* Һ. Дәүләтшина.

**ОТҠОШОУ** *к. урт. кар.* **отҡоу.**

**ОТЛИ́ЧНИК** [*рус.*] *и.* **1.** Төп фәндәрҙән «отлично» билдәләре генә алып уҡыған уҡыусы. *Отличник булам тиһәң, һабағыңды ныҡ ҡара.* Ф. Дәүләтшин.

**2.** Үҙ эшен бик яҡшы итеп үтәгән кеше. *Халыҡ мәғарифы отличнигы.*

**ОТЛИ́ЧНО** [*рус.*] *и. мәғ.* Юғары баһаны йәки сифатты белдергән билдә; бик яҡшы. *Отличное алыу. Отличноға уҡыу. Мәктәпте отличноға тамамлау.*

**ОТЛОҠТО** *ымл. һөйл.* Көтөлмәгән ҙур уңыш килеп сыҡҡанда шатлыҡты белдереп әйтелә торған һүҙ. *Отлоҡто! Мурҙаға елле сурағай төшкән.*

**ОТОЛАРИНГÓЛОГ** [*рус.*] *и.* Отоларингология өлкәһендә эшләгән врач.

**ОТОЛАРИНГОЛÓГИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Ҡолаҡ, танау, тамаҡ ауырыуҙарының барлыҡҡа килеү сәбәбен, дауалау һәм киҫәтеү ысулын өйрәнә торған клиник медицина фәне.

**ОТОЛОУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **отоу**[1]. *Уйында отолоу.*

**2.** Яйһыҙ, насар, үкенесле хәлгә ҡалыу. *Үкенмәҫһең, ышан, һин бер ҙә отолманың тыуып был ерҙә.* М. Кәрим. *Әйҙә, әйҙә кит ... Бармаһаң, отолорһоң, .. тиештеләр.* Н. Ҡәрип.

**ОТОРО** *и.* **1.** Кире йүнәлеш, ҡаршы; *киреһе* ыңғай. *Оторо*һона *һыйпау. // Оторо яҡ.*

**2.** *р. мәғ.* Ниҙәндер йүнәлешенә ҡаршы; кире. *Бер төркөм халыҡ Хафизовтың фекерен яҡланы, [калғандары] уға оторо һөйләне.* А. Игебаев. **Оторо килеү** ҡаршылыҡ күрһәтеү; ҡаршы килеү. *Ни эшләйем тиһәң дә оторо килә лә тора.* **Оторо китеү** киреләнеү. *Һин уға яҡшылап әйтәһең, ә ул оторо китә башлай.* **Оторо тороу** ҡаршылыҡ күрһәтеү; ҡаршы тороу. *«Белем кемгә кәрәкмәй, уға оторо торған кеше алйот булыр»,— тип көлдө Сабир.* С. Кулибай.

**3.** *р. мәғ.* Бигерәк тә, айырыуса. *Оторо елкенеү. Оторо ҡыҙыу.* ■ *Эш кешеһенә сәй оторо тәмле була ул.* Х. Кәрим. / Ул хәтле үк, бик үк. *Оторо насар түгел хәлебеҙ.*

**4.** *бәйл. мәғ.* Төбәү килешендәге һүҙҙәр менән килеп, кире йүнәлештә йәки ниндәйҙер ваҡытҡа яҡынлағас, ҡаршы, тигән мәғәнә аңлата. *Елгә оторо. Кискә оторо. Таңға оторо.* ■ *Һыу ашҡына беҙҙең алға, тауға оторо ағып.* Н. Бикмәтов. *Көҙгә оторо балыҡ эләкмәй башлай.* Т. Баишев.

**ОТОРОЛАШЫУ** *к.* Ҡаршылыҡ күрһәтеү; ҡаршылашыу. *«Ҡалдырмайым»,— тине малай, оторолашып.* Ә. Бикчәнтәев.

**ОТОУ**[1] *к.* **1.** Уйында, ярышта артта ҡалдырыу, еңеү. *Ул [Әминбәк] сатрашты шул тиклем оҫта итеп уйнарға өйрәнгән, хатта өйрәткән кешенең үҙен дә ота ла ҡуя икән* (Әкиәттән).

**2.** Шарт ҡуйып уйнала торған уйында еңеп, ниҙер алыу. *Былар тағы ла кәрткә йәбешкән .. Эфисәр ҡыҙҙың бөтә аҡсаһын отоп алған* (Әкиәттән). / Заём йәки лотереяның номеры тап килеп, ниҙер алыу. *Биш һум отоу. Келәм отоу.* / *күсм.* Арттырып, файҙаға ҡалдырыу. *Һәр минутты отоу өсөн көрәш бара.*

**3.** Кемгәлер килтерелгән зыян иҫәбенә файҙа күреү. *Һыйырҙы тайға алмаштырып оттом.* / Яйлы, яҡшы хәлдә ҡалыу. *Кискә ҡарай юлға сыҡмай оттоң.*

**ОТОУ**[2] *к.* Ниҙәләр кешенән күреп йәки ишетеп хәтерҙә ҡалдырыу; өйрәнеү, үҙләштереү. *Отоп алыу. Һүҙҙе отоу.* ■ *Һағынғанда бер йырларһың, был йырымды отоп ал* (Халыҡ йырынан).

**ОТОШ** *и.* **1.** Заём йәки лотерея уйыны.

**2.** Берәй уйында (заём, лотерея, лото һ. б.) отоп алынған нәмә. *Ҙур отош. Ҙур отош алыу. Отош сығыу.* ■ *Заем алһаң, отош сыға беҙҙең кеүек егеткә* (Халыҡ йырынан).

**3.** Өҫтәмә табыш, файҙа. *Яңы ысул ҙур отош бирә. Отошҡа килтереү.*

**ОТОШЛО** *с.* **1.** Отош (2 мәғ.) бирә торған. *Отошло вклад. Отошло заём.*

**2.** Табыш килтерә торған; файҙалы. *Отошло тармаҡ.* / Уңыш килтерә торған; уңышлы. *Топонимик атамаларҙы өйрәнеү бигерәк тә милли мәктәп уҡыусыларына патриотик тәрбиә биреү эшендә отошло алым булып тора.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1968, № 3.

**ОТПО́Р** [*рус.*] *и.* Һөжүмгә ҡаршы йүнәлтелеп, уны кире ҡаҡҡан һуғыш. *Отпор алыу. Отпор биреү.* ■ *Дошман атакаһына отпор бирелде..* С. Әлибаев. / *күсм.* Кемдеңдер ынтылышын, һүҙен кире ҡағып, юҡҡа сығарған яуап. *Ғаббас Сынбулатов .. үтә «ныҡ белеп» барған кешеләргә яйы килгән һайын отпор биреп торҙо.* М. Тажи.

**О́ТПУСК** [*рус.*] *и.* Ял итеү, дауаланыу йәки башҡа кәрәк өсөн эштән, хеҙмәттән азат иткән билдәле бер осор. *Декрет отпускыһы. Отпуск ваҡыты. Сираттағы отпуск. Отпуск биреү. Отпускыға китеү.*

**О́ТРУБ** [*рус.*] *и.* Общинанан хуторға сыҡҡан крәҫтиәндәргә йәмәғәттән бүлеп бирелгән ер (1906—1916 йылдарҙа булған). *Байҙар яңы закон буйынса, бөтә ерҙе юк-буш хаҡҡа ғына төшөрөп, отрубҡа ҡырҡып алып бөттө.* Һ. Дәүләтшина.

**ОТРЯ́Д** [*рус.*] *и.* **1.** Махсус ғәскәри төркөм. *Крейсерҙар отряды. Ҡораллы отряд. Отряд командиры. Отряд штабы. Партизандар отряды.*

**2.** Дөйөм бер эште башҡарыу өсөн бергә ойошҡан кешеләр; төркөм. *Геологик отряд. Пионерҙар отряды. Экспедицион отряд.*

**ОТСЁК** [*рус.*] *и.* Карап, самолёт һ. б. нәмәнең айырып йәки һыу, һауа үтмәҫлек итеп бүлеп ҡуйған махсус бүлмәһе; бүлкә. *Йыһан карабының отсеғы.*

**ОТСРО́ЧКА** [*рус.*] *и.* Ниҙең дә булһа һуңыраҡ ваҡытҡа күсерелеше; мөҙҙәт. *Отсрочка алыу. Отсрочка биреү.* ■ [*Ғариф — Ғәләүгә:*] *Ваҡыт юҡ, ҡустым, ваҡыт юҡ.. Былай булһа, үлемдән мөҙҙәт, һеҙеңсә әйтһәк, отсрочка һорап торорға тура кил*[*ә инде*]. Б. Бикбай.

**ОТСТА́ВКА** [*рус.*] *и.* Кешенең хәрби хеҙмәттән бөтөнләй китеүе. *Отставка алыу. Отставкала булыу. Оставкаға сығыу.*

**ОТСТАВКАЛАҒЫ** *с.* Отставкаға сыҡҡан, отставкала йөрөгән. *Отставкалағы майор.*

**О́ТТИСК** [*рус.*] *и.* **1.** Тексттың, һүрәттең һ. б. полиграфик ысул менән алынған күсермәһе. *Гравюра оттискыһы. Корректура оттискыһы. Оттиск алыу. Оттискыны типографияға тапшырыу.*

**2.** Журнал йәки йыйынтыҡтан алып, айырым төпләнгән мәҡәлә.

**ОТТОРОУ** *к.* Ҡомарлы һ. б. уйында еңелеүгә дусар булып, отош биреү, түләү. *Һәр отоуҙың була оттороуы, һәр бер теләк йөрөмәй һиненсә.* Ғ. Хәйри. *Бай булһа ла, аҡылы һай икән, кәрт уйнатып ҡыҙын отторған* (Халыҡ йырынан).

**ОТТОРОШҺОҘ** *с.* Отмайынса ҡалмай торған, мотлаҡ ота торған. *Оттороршһоҙ заём. Отторошһоҙ лотерея.*

**ОТХО́Д** [*рус.*] *и.* *һөйл. кар.* **ҡалдыҡ** 2. *Нефть отходтары.*

**ОТЧЁТ** [*рус.*] *и.* Эштең барышы йәки үтәлеше тураһындағы рәсми яуап; иҫәп. *Ғилми эш тураһындағы отчёт. Командировка тураһындағы отчёт. Отчёт доклады. Отчёт йыйылышы. Отчёт осоро. Отчёт биреү. Отчёт алыу. Отчёт яһау.* / Алынған аҡсаның тотонолошо тураһындағы иҫәп ҡағыҙы. *Аванс отчёты. Финанс отчёты.*

**Отчёт һайлау йыйылышы** ниндәйҙер йәмәғәт ойошмаһының эшенән иҫәп алып, урынына яңынан һайлау өсөн үткәрелгән йыйылыш.

**ОТЧИСЛЕ́НИЕ** [*рус.*] *и.* Ҡайҙандыр нимәгәләр бүленгән аҡса. *Төҙөлөшкә бүленгән отчисление. Килемдән алынған отчисление.*

**ОФИЦЕ́Р** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Армия һәм флоттағы командирҙар составына ингән кеше. *Запастағы офицер. Флот офицеры. Штаб офицеры. Элемтә офицеры. Офицер дәрәжәһе.* ■ *Уҡа бауҙарға уралған офицерҙар .. минут һайын һыу эсә.* И. Насыри.

**ОФИЦИАЛЬ** [*рус.* официальный 〈 *лат.*] *с. кар.* **рәсми.**

**ОФИЦИА́НТ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Ашханала, ресторанда кешегә аш килтереп йөрөгән хеҙмәткәр.

**ОФИЦИОЗ** [*рус.* официозный 〈 *нем.*] *с.* Формаль яҡтан хөкүмәткә бәйләнешле булмаһа ла, асылда уның фекерен яҡлаған. *Официоз газета.*

**ОФОК** [*гәр.*] *и.* **1.** Күк менән ерҙең тоташҡан һымаҡ булып күренгән һыҙығы. *Эңер төшөп килә. Йәйге ҡояш .. офоҡҡа инеп бара.* З. Биишева. / Күк йөҙөнөң ер өҫтөнә яҡынайған ауыш өлөшө; күк сите. *Сәскәләргә таң ысығын бөркөп, Сулпан ҡалҡа, офоҡ аллана.* Р. Ғарипов. / Күҙ күреме иңләй ала торған ҙур майҙан, алыҫлыҡ.

**2.** *күсм.* Эшмәкәрлек, белем киңлеге. *Ваҡыт үтеү менән уның [Ишмулла Дилмөхәмәтовтың] ижади офоғо киңәйә бара.* Р. Йәнбәков.

**ОФОРМЛЕ́НИЕ** [*рус.*] *и.* Берәй нәмәнең тышҡы биҙәлеше, эшләнеше. *Китаптың оформлениеһы. Спектаклдең оформлениеһы.*

**О́ХРА** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Һары йәки ҡыҙыл төҫтәге тәбиғи минераль буяу.

**ОХРА́НКА** [*рус.*] *и. һөйл.* Революцияға тиклемге Россияла булған йәшерен полиция. *1848 йылда Даль, батша охранкаһының эҙәрләүенән ҡурҡып, байтаҡ ҡына кульәҙмаһын яндырырға мәжбүр була.* «Әҙәби Башҡортостан», 1950, № 4.

**ОХРАУИ** [*гәр.*] *с. иҫк.* Әхирәткә, теге донъяға бәйләнешле. *Бигерәк тә охрауи китаптарҙы уҡығанда ныҡ тәьҫирләнеп, [эсәйемдең] йөҙөнә ҡурҡыу менән өмөт ҡатыш ғәләмәттәр сыға торғайны.* М. Ғафури.

**ОЦЕЛО́Т** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Көньяҡ Америкала йәшәгән һары йәки буҙ сыбар төҫтәге ҙур ҡырағай бесәй.

**О́ЧЕРЕДЬ** [*рус.*] *и.* Автоматик һуғыш ҡоралынан бер ыңғай атылған бер нисә патрон йәки снаряд. *Хәлһеҙләнгән майор автоматын ҡыҫып тотто ла, бер нисә очередь бирҙе.* Ә. Ихсан.

**О́ЧЕРК** [*рус.*] *и.* **1.** Тормоштағы ысын кеше һәм хәл-ваҡиғаларҙы һүрәтләгән бәләкәй күләмле әҙәби әҫәр. *Бөтә көсөн биреп, намыҫ менән эшләгән ябай хеҙмәт кешеләре тураһында матур итеп яҙылған очерктар уҡығы килә.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 5 май.

**2.** Үҙ-ара бәйләнешле айырым-айырым мәсьәләне яҡтыртҡан махсус ғилми хеҙмәт. *Башҡортостандың тарихы тураһындағы очерктар.*

**ОЧЕРКИ́СТ** [*рус.*] *и.* Очерк яҙыу менән шөғөлләнгән яҙыусы йәки журналист. *Очеркист булып китеү.*

**ОЧКО́** [*рус.*] *и. кар.* **мәрәй** 3. *Очко һаны.*

**ОШАҠ** *и.* Кеше өҫтөнән кемгә лә булһа еткерелгән һүҙ. *Ошаҡ йөрөтөү. Ошаҡ ташыу. Ошаҡ һатыу.* ■ *Кулактарҙың ошағы менән активистарҙы ҡулға ала башлайҙар.* И. Ниғмәтуллин. **Ошаҡ тоҡсайы** һүҙ еткереп, ошаҡлап торорға яратҡан кешегә әйтелә.

● *Ошаҡ — осло бысаҡ.* Мәҡәл.

**ОШАҠЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **ошаҡлау.**

**ОШАҠЛАУ** *к.* Кеше өҫтөнән кемгә лә булһа һүҙ еткереү. *Кемдер Айрастың башмаҡ менеп, сабып йөрөгәнен күреп ҡалған да, .. Олкаман байға барып ошаҡлаған.* Ш. Насыров.

**ОШАҠЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **ошаҡлау.**

**ОШАҠСАН** *с.* Ошаҡлай һалып барыусан. *Эйе, ул [Мәғфиә] ошаҡсан булманы, ауыл буйын ҡыҙырманы, алабайҙан ялбырлап, эшләне лә йөрөнө.* Б. Бикбай.

**ОШАҠСЫ** *и.* Ошаҡ йөрөтөүсе.

**ОШАМАҠ** *с. диал. кар.* **ямаҡ** [1].

**ОШАУ** *к. диал.* Оҡшау.

**ОШБУ** *а. иҫк. кит. кар.* **ошо.** *Ошбу малай Миңнезарифты һеҙ ҡабул итеп алығыҙ.* Ғ. Ғүмәр.

**ОШО** *күрһ. а.* **1.** Бик яҡында булған йәки күренеп торған нәмәне күрһәтеү осон ҡулланыла. [*Рәхимә:*] *Ҡана, килен, һин оҫта яный торғанһың, ҡаҙан ҡылысына ғына ошоно бер-ике тартып бир әле.* Һ. Дәүләтшина. *Һары ат Кейеҙбайҙы бер ҡул буйына алып бара ла: «Ошо ҡулға төшөп, өс тапҡыр сумып сыҡ»,— ти* (Әкиәттән).

**2.** Берәй нәмәне айырым билдәләү өсөн ҡулланыла. *Ошо урында [Йәнтимер] тағы беҙҙең янга килеп туҡтаны.* С. Агиш.

**3.** Ваҡытты аңлатҡан һүҙҙәр менән килгәндә, билдәле бер мәлде айырып күрһәтә. *Ошо ваҡытта. Ошо минутта. Ошо мәлдә.* ■ *Ошо төндә улар һүҙ ҡуйышты тормош юлын бергә ҡушырға.* Ғ. Сәләм.

**4.** Берәй нәмәгә баҫым яһар өсөн ҡулланыла. [*Фәхри:*] *Эй, рәхәт тә ошо ятыуҙары.* Б. Бикбай. [*Гөлйөҙөм:*] *Әй инде, ошо Йәнбикә булһа, уйнағанды ҡутәрмәҫ.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Ошо арала** яҡын үткән ваҡытта йәки яҡын киләсәктә. *«Ошо араларҙа жалованиe алам да, самауыр, сынаяҡ, ҡунаҡ, сүместәр, һиңә ҡулдәктәр алам»,— тием.* Т. Йәнәби. **Ошомо ни** берәй нәмәгә ризаһыҙлыҡ белдергәндә әйтелә.— *Ошомо ни тормош!* **Ошо рәүешле** (*йәки* **рәүештә**) эш-хәрәкәттең башҡарылыу рәүешен билдәле нәмәгә тоҫҡағанда, сағыштырғанда әйтелә. [*Беҙҙең һүҙ*] *ошо рәүешле талғын ғына бара.* С. Агиш.

**ОШОҒАСА** *р.* Ошо ваҡытҡа тиклем. [*Аҡбулат:*] *Был көршәк яһаған ҡомдо ла, уның юйылмаҫ буяуҙарының серен дә ошоғаса белгән кеше юҡ әле.* З. Биишева.

**ОШОҠ** *с. диал.* Ҡулсыр.

**ОШОЛАЙ** *р.* Ошо рәүешле. *[Таҙ:] Төшөмдә ошолай ҡара икмәк менән картуф ашап ултырғанымды күргәйнем* (Әкиәттән).

**ОШОЛАЙТЫУ** *к.* Ошолай итеү, ошо рәүешле итеү. [*Тимергәле — Ныяҙғолға:*] *Әле бына ҡасан ғына һинең атайың мәрхүм менән ошолайтып мәсеттән ҡатарланып ҡайта торғайныҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**ОШОНАН** *р.* Билдәле бер урындан, ерҙән.— *Еҙнә һин ошонан сыкмай тор* (Әкиәттән).

◆ **Ошонан һуң** билдәле мәлдән, вакыттан һуң. *Ошонан һуң таралыштык.*

**ОШОНДА** *р.* **1.** Билдәле урында, ерҙә.— *Миңә ошонда ла ярар.* Т. Йәнәби. [*Карт.:*] *һин ошонда тороп тор, мин катындан самауыр койҙорайым* (Әкиәттән).

**2.** Билдәле урынға, ергә. *Бөгөн ошонда кусеп килдек.* С. Агиш.

**ОШОНДАЙ** *с.* Билдәле бер нәмәгә окшаған, ошоноң кеүек. *Ул көндө лә ошондай тымык .. көн ине.* З. Биишева. *Ошондай кот оскос хәлдәргә бер төрлө лә сара күрмәй .. карап калыу мөмкин түгел.* М. Тажи.

**ОШТАУ** *к. диал.* Тотоу. *Атты теҙгененән оштау.*

**ОЯ** *и.* **1.** Коштарҙың һәм кайһы бер йәнлек, бөжәктәрҙең йәшәү, үрсеү өсөн яһаған урыны. *Кош ояһы. Иңкеш ояһы. Сыскан ояһы. Тейен ояһы. Һағыҙак ояһы. Оя яһау.* ■ *Ирәндектең кара ташы — кук буренең ояһы* (Халык йырынан). / Шул ук максатта коштар һәм кайһы бер йәнлектәр өсөн кеше яһаған нәмә. *Сыйырсык ояһы. Тауык ояһы. Эт ояһы.* ■ *Өй эсендә, ишек төбөндә бер каҙ ултыра алтын ояла.* Ш. Бабич. / *кусм. һөйл.* Кешенең йәшәгән урыны; өй, торлак. *Оя короу.* ■ *Олатайҙар корған оялар, хәҙер инде беҙгә тар улар.* К. Даян.

**2.** Үҫемлектең орлоғон тупракка сәсеү, үҫентеһен ултыртыу өсөн сокорорак итеп яһаған урын. *Егерме оя кәбеҫтә.*

**3.** *лингв.* Бер тамыр эргәһенә туплап бирелгән һүҙҙәр төркөмө.

**4.** *һөйл.* Нимәнелер төшөрөп, кейҙереп куйыу өсөн яһалған сокор. *Ғатаулла карт .. өрлөк өҫтөндә асамай ояһы сокоп ултырта.* Й. Солтанов.

**5.** *кусм.* Ни ҙә булһа бик күп булған, күп булып йыйылған урын. [*Кафия:*] *Байрамбикә, йәтимдең теләгәне — ерҙә. Еләктең ояһына осраным.* Ш. Шәһәр.

◆ **Оя баҫыу** бала сығарыу максатында билдәле бер вакыт йомортка өҫтөндә ултырыу (кош-кортка карата). *Бына бер вакыт тауык оя баҫып, себеш сығарҙы, ти* (Әкиәттән). **Оя төбө** 1) иң аҙактан сыккан бәләкәй генә себеш йәки бәпкә; 2) *кусм.* кинйә бала. **Шайтан ояһы** *кар.* **шайтан.**

● *Эт ояһында көслө.* Мәкәл.

**ОЯЛАНЫУ** *к.* Оялыға әйләнеү, оялы булыу. *Өйрәкәйҙәр, аҫыл йөрәкәйҙәр, ояланып тормош коралар.* Р. Шәкүр.

**ОЯЛАТЫУ** *к.* Ояларға мөмкинлек биреү, оялы итеү. *Кош оялатыу.*

**ОЯЛАУ** *к.* **1.** Оя яһап урынлашыу, ояға урынлашыу. *Йылан ояланған. Кош ояланған. Сыйырсык ояланған.* / *кусм.* Файҙалы ергә урынлашыу. *Сауҙа тирәһенә оялап алыу.*

**2.** *кусм.* Бер ергә тупланып, урынлашыу. *Бер кышлакка оялап алған баҫмасыларҙы юк итеү бурысы куйылды.* «Ағиҙел», 1962, № 1.

◆ **Оялап сәсеү** бер нисәһен бергә бер оя итеп сәсеү.

● *Бутәгәгә буҙ тургай оялай.* Мәкәл.

**ОЯЛЫШЫУ** *к.* Бер йәтеш ергә урынлашыу; оялау. *Колхозға оялашыу.*

● *Йылы ерге йылан оялаша.* Әйтем.

**ОЯЛДЫРЫУ** *к. кар.* **оялтыу.** *Кеше алдында оялдыра.*

**ОЯЛСАК** *с. кар.* **оялсан.**

**ОЯЛСАН** *с.* Тиҙ уңайһыҙланып, оялып барыусан; оялсак. *Уның* [*Зөлкәрнәйҙең*] *килгәнен әллә кайҙан алыҫтан күреп калған оялсан Зөлхизә капыл .. кыуаклык араһына йәшенгән.* Н. Иҙелбай.

**ОЯЛСАНЛАНЫУ** *к.* Оялсанға әйләнеү, оялсан булыу.

**ОЯЛТЫУ** *к.* **1.** Уңайһыҙлык тойҙороу. *«Куйығыҙ әле,— тине Алтынбикә,— баланы юкка оялтмағыҙ».* М. Тажи. / Оятка калдырыу. *Кеше алдында оялтыу.*

**2.** *эйһ. ф. кар.* **оялыу.** *Нык оялтты. Кешенән оялта.*

● *Һылыу килен туйҙа оялтыр.* Мәкәл.

**ОЯЛЫУ** *к.* Уңайһыҙлык тойоу; тартыныу, оятһыныу. [*Сахап:*] *Оялмайынса төнө менән көлтә урлап йөрөйһөң, собака!* Т. Йәнәби. *Хактан курկмай, хурлыктан оялмай ялғансылар суфый исемен тотор имде* (Бәйеттән).

● *Оялмаған бойормағанды ашаған.* Мәкәл.

**ОЯЛЫШ** *и.* Оялыу хисе. *Егет оялышынан кыҙға кутәрелеп карарға ла кыймай* (Әкиәттән).

**ОЯЛЫШЫУ** *к. урт. кар.* **оялыу.** *Оялышып, өйгә инмәй тороу.*

**ОЯН** *с.* Тығыҙ булып нык ойошкан. *Оян йөн. Оян ял.*

◆ **Оян** үлән *диал.* бутәгә.

**ОЯТ** *и.* **1.** Уңайһыҙланыу, тартыныу тойғоһо. *Комһоҙ булһаң, оят кәрәкмәй бит ул* (Әкиәттән).

**2.** Хурлыклы, мәсхәрәле хәл. *Оят булыу. Оятка калыу.* ■ *Инде хәҙер, укый белмәү түгел, дөрөҫ яҙмау оят һанала.* Ғ. Амантай. **Йөҙгә** (*йәки* **биткә**) **оят килеү** оят хәлгә калыу. *Батыр яуға сыкмаһа, оят килер битенә.* М. Хәй. **Әҙәм оятына калыу** хурлыклы хәлгә калыу.

◆ **Оят** ер енси ағзаның ситләтелгән исеме. **Ояты(ң) юк** кешенең әҙәп-тәртипкә һыймаған эше өсөн нык үртәнеп әрләгәндә әйтелә. [*Халык — Ныязғолға:*] *Дисәтинәһен 20 һумдан биреп, файҙа итеп ятаһың!.. Төптө оятың юк!* Һ. Дәүләтшина. **Әҙәмдән оят** берәй хәлгә хурланғанда, әсенеп әйтелә. *[Ғәлиҙең әсәһе:] Әҙәмдән оят, бер хәйерсе кыҙы менән йөрөй тигәнгә нисек сыҙарһың.* М. Ғафури. **Оят һүҙ** насар, эшәке һүҙ.

● *Байлык морат түгел, ярлылык оят түгел.* Мәкәл. *Каҙандан капкак китһә, эттән оят китә.* Мәкәл. *Әҙәп барҙа оят бар.* Мәкәл.

**ОЯТЛАУ** *к.* Оятка һанау.

● *Торна оятын оятлап, ябалак урманга каскан.* Мәкәл.

**ОЯТЛЫ** *с.* Оят хәлгә калған. *Оятлы булыу.* ■ *[Зәйтүнә:] Кем килһә лә, шулай һөйләнеп оятлы итә ул минең өләсәйем.* Ш. Янбаев.

● *Сәләм бирмәгән бер оятлы, яуап бирмәгән мең оятлы.* Мәкәл.

**ОЯТСЫЛЫК** *и.* Мәсхәрә килтерерлек хәл; хурлык. *Оятсылык килтереү.*

**ОЯТҺЫҘ** *с.* Тартына, ояла белмәгән; намыҫһыҙ. *Оятһыҙ кеше.* ■ *Ҡайһы берәүҙәр әҙәм рәтле һөйләй алмауҙарын телдең ярлылығынан күрәләр. Был — бөтөнләй намыҫһыҙлыҡ, оятһыҙлыҡ.* Ғ. Сәйетбатталов. *[Мәғзүмә:] Эт менән эт булғым килмәй минең! Тфү, оятһыҙ!* Б. Бикбай.

**ОЯТҺЫҘЛАНЫУ** *к.* Әҙәпте, тәртипте, оялыу-тартыныуҙы белмәй ҡыланыу. *Сикһеҙ оятһыҙланыу. Кеше алдында оятһыҙланыу.*

**ОЯТҺЫНЫУ** *к.* Ояҡа һанау, оялыу. *Йомошҡа барыуҙы оятһыныу. Кеше алдында йырлауҙы оятһыныу. Оятһынып йөрөү.*

# Ө

**Ө** Башҡорт алфавитының егерме беренсе хәрефе.

**ӨБӨРЛӨКӘЙ** *и. диал.* Аҡ томбойоҡтоң сәскә яралғыһы.

**ӨБӨРӨ** *и.* **1.** Нимәнеңдер өҫтөндә мамыҡланып торған ҡыҫҡа йөн йәки еп. *Дебет шәлдең өбөрөһө ҡалҡҡан.*

**2.** *кар.* **өбөрсә.**

**ӨБӨРӨЛӨ** *с.* Өбөрөһө булған, йөнтәҫ. *Өбөрөлө таҫтамал. Өбөрөлө итеү.*

**ӨБӨРӨЛӘНЕҮ** *к.* Өбөрөләре сығып йәки туҙып йөнтәҫләнеү. *Бәйләм кейем тиҙ өбөрөләнә.*

**ӨБӨРӨЛӘҮ** *к.* Өбөрөлө итеү, йөнтәҫләү. *Өбөрөләп һуғыу.*

**ӨБӨРСӘ** *и.* Эске ағзаларҙың тиресәһендә була торған ваҡ ҡына йөнтәҫ үҫенте. *Эсәк өбөрсәләре.*

**ӨБӨРҺӨ** *и. диал.* Өбөрһә.

**ӨБӨРҺӨҮ** *к. диал. кар.* **өлбөрәү** 1. *Өбөрһөп бөткән кейем.*

**ӨБӨРҺӘ** *и.* Нимәнеңдер ҡырылыу, туҙып теткеләнеү сәбәпле барлыҡҡа килгән йөнтәҫе.

**ӨБӨРҺӘЛӘНЕҮ** *к. кар.* **өлбөрәү** 1.

**ӨБӘТЕҮ** *к.* Әҙ генә иретеп йомшартыу (итте, балыҡты).

**ӨБӘҮ** [1] *к.* Иреп йомшарыу (иткә, балыҡҡа ҡарата).

**ӨБӘҮ** [2] *с.* Йомшаҡ, ирегән. *Өбәү ит.*

**ӨГӨЛДӘҮ** *к.* Тамаҡ төбөнән өңкөлдәгән тауыш сығарыу (айғыр малына ҡарата). *Муйынын дуғаландырып, өгөлдәй-өгөлдәй айғыр икенсе өйөргә ҡаршы сапты.* Я. Хамматов.

**ӨГӨМӘ** *и.* Гел өйрәтеп, өгөп тороусан кеше.

**ӨГӨТ** *и.* Берәй нәмәгә өндәп бирелгән кәңәш; дим. *Өгөт биреү.* ■ *— Шуға, балам, һиңә бер өгөтөм шул: илеңде, дәүләтеңде ныҡ һөйөп бул.* М. Ғафури.

● *Үкһеҙгә өгөт бирмә, урын бир.* Мәҡәл.

**ӨГӨТЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **өгөтләү.**

**ӨГӨТЛӘҮ** *к.* Берәй нәмәгә өндәү, өндәп кәңәш биреү. *[Ҡатын:] Былай эшләү ярамаҫ тип, мин уны күпме өгөтләнем. Башҡа кешеләр тормошонан һәйбәт миҫалдар килтерҙем.* Х. Зарипов.

**ӨГӨТ-НӘСИХӘТ** *и. йыйн.* Аҡыл, кәңәш биреп һөйләнгән һүҙ. *Өгөт-нәсихәт биреү.* **Өгөт-нәсихәт укыу** кәрәккән-кәрәкмәгәндә кешегә аҡыл өйрәтеү. *[Тайморзин — Сәгиҙәгә:] Ғәфү итегеҙ, Сәгиҙә Хәсәновна, мин һеҙгә өгөт-нәсихәт уҡырға йыйынмайым.* М. Тажи.

**ӨГӨТСӨ** *и.* Өгөт биреүсе.

**ӨГӨҮ** (өк≠) *к.* **1.** Өгөтләү, өндәү. *Ата улын тик яҡшылыҡҡа өгә.*

**2.** Өҫтө-өҫтөнә әйтеп, ныҡыу. *[Ғариф:] Ялҡау өйөрлө. Арҡыры ағасты буй ҙа бороп һала белмәйҙәр, өгөп тормаһаң.* Ж. Кейекбаев.

**ӨҘГӨЛӘНЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **өҙгөләү.** *Сығырға эләгеп өҙгөләнгән арҡан.*

**2.** Киҫәк-киҫәк булып өҙөлөү, йыртылыу. *Ат юҡ. Өҙгөләнгән тышауы ғына табылды.* Т. Хәйбуллин. *Әй китте, әй китте, ти, был [егет], ашар аҙығы ҡалманы, өҫтө-башы ла өҙгөләнеп бөттө, ти* (Әкиәттән).

**3.** *күсм.* Бик ныҡ борсолоп, тынғыһыҙланыу; өҙәләнеү. *[Хәйбуллин] Ҡунаҡкол өйөндә ишекле-түрле йөрөй, ни тынысланa, ни яуап таба алмай өҙгөләнә.* Х. Ғиләжев.

**ӨҘГӨЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **өҙгөләү** 1. *[Әбей — Ҡарасманға:] Батша хәҙер өйҙә юҡ. Ҡайтып инһә, һине лә, мине лә эттәренән өҙгөләтеп ташлар. Улым, зинһар, кит* (Әкиәттән).

**ӨҘГӨЛӘҮ** *к.* **1.** Киҫәк-киҫәк итеп өҙөү, йыртыу. *Ат үҙе кешнәй, үҙе тибешә, ти бахырың, аяғындағы тышауҙарын, башындағы йүгәндәрен өҙгөләп бөттө, ти* (Әкиәттән). / Өҙөп-йолҡоп ботарлау. *Ике бөркөт бер бүрене осортоп алып менгән дә өҙгөләп ашай башлаған* (Әкиәттән).

**2.** Өҙөп-йолҡоп алырҙай итеп тартҡылау. *Ел ағастарҙы өҙгөләй.*

**3.** *күсм.* Бик ныҡ борсолдороп, тыныcһыҙлау. *Йөрәкте өҙгөләү.* ■ *Туҡта, таң еле.. Тыңла уның йырҙарын! Унан тағы ла .. шат йөрәктәрҙе осондороп, ҡайғылы йөрәктәрҙе өҙгөләп керерлек көс менән өрөрһөң.* Б. Ишемғол.

**ӨҘГӨЛӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **өҙгөләү** 1. *Уйнап, кейемдәрен өҙгөләшеп бөткәндәр.*

**ӨҘГӨРТӨҮ** *к. диал.* Һеслəтеү.

**ӨҘГӨС** [1] *и.* **1.** *һөйл.* Һәр нәмәне өҙөп-йыртып барыусан, һаҡһыҙ кеше (ғәҙәттә балаларға ҡарата әйтелә). *Өҙгөс булыу.*

**2.** *күсм.* Аҡса-мал өсөн намыҫын һатып, нисек тә файҙа сығарыуҙы ғына ҡарап торған кеше; йолҡҡос. *[Гәндәлип — Ләйсәнгә:] Илдус өс сумаҙан әйбер тейәп ҡайтҡан, ти, аҡкошом.. Нәҫеле менән өҙгөстәр инде. Ҡәбереңякын булмаһын.* Ә. Мирзаһитов.

♦ **Йөрәк** (*йәки* **йән, үҙәк**) **өҙгөс** 1) йөрәккә үтеп инерлек, бик ныҡ тәьҫир итерлек; тетрәткес. *[Алпамыша] ҡулына ҡурайын алды, ти, бик матур, үҙәк өҙгөс бер көй тартып ебәрҙе, ти* (Әкиәттән); 2) йән өшөтөрлөк; ҡурҡыныс. *Ҡара болот һымаҡ ниндәйҙер бер нәмә йөрәк өҙгөс эсе тауыш менән ергә килеп төштө.* М. Тажи.

**ӨҘГӨС** [2] *и. махс.* Электр сымындағы тоҡты йәки торбалағы газ, шыйыҡлыҡ ағымын өҙә торған ҡулайлама. *Терегөмөшлө өҙгөс. Электрик өҙгөс.*

**ӨҘГӨСЛӨК** *и.* Өҙгөскә (2 мәғ.) хас сифат. *[Ул] таба, ойоштора, ҡайһы саҡ элекке өҙгөслөгө лә ярҙам итеп ҡуя.* Ғ. Ибраһимов.

**ӨҘГӨСЛӘҮ** *к.* **1.** Көс менән тартып, киҫәк-киҫәккә өҙөү; өҙгөләү. *Өҙгөсләп ташлау.* ■ *Сәмрегош саҡлы ике бөркөт бер бүрене ҡаяға осортоп алып меңгәндәр ҙә өҙгөсләп ашай башлағандар* (Әкиәттән).

**2.** Өҙөп-йолҡоп алырҙай итеп тартҡылау. *Кейеменән өҙгөсләп тартыу.* ■ *Иркәнең, һүҙен тыңламай Имәнтауға китеп барғанын ишеткәс, Эфләтунов үҙен-үҙе өҙгөсләр хәлгә етте.* Ә. Вәли.

**ӨҘГӘЛӘҮ** *к. диал.* Өҙгөләү.

**ӨҘҘӨРӨҮ** *к.* **1.** *йөкм. ҡар.* **өҙөү** 3, 6. *Дошман оборонаһын өҙҙөрөү. Үҙ-ара бәйләнеште өҙҙөрөү.*

**2.** Көс менән тарттырып, өлөшкә бүлдереү. *Арҡанды өҙҙөрөү. Епте өҙҙөрөү. Теҙгенде өҙҙөрөү. Урталай өҙҙөрөү. Икегә өҙҙөрөү.* / *күсм.* Бик нығ тартып, ҡыҫыу; нескә генә итеү. [*Зөлхизә*] *нәҙекәй булдәрен өҙҙөрөп, үҙенә камзул тегеп кейҙе.* З. Биишева. [*Ҡатын*] *билен бал ҡортоноҡо кеүек итеп өҙҙөргәнсе быуған.* И. Ғиззәтуллин.

**3.** Берәй нәмәне береккән, тоташҡан йәки үҫеп ултырған еренән алдырыу йәки йолҡорға юл ҡуйыу. *Алманы өҙҙөрөү. Кейемдең һиҙәбен өҙҙөрөү.* / Ағзаны кәүҙәнән айыртыу. *Бармағын өҙҙөргән булып, һалдаттан ҡасҡан теге ат ҡарағы бына ошо инде.* Ш. Насыров. [*Аҡъял батыр:*] *Үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш ҡарттан ҡайһығыҙ колағын, ҡайһығыҙ иренен .. өҙҙөрөп .. шуны әйтмәй йәрөйһөгөҙ* (Әкиәттән).

**4.** *күсм.* Эште, планды йәки билдәләнгән башҡа сараны үтәүгә ҡамасаулау. *Графикты өҙҙөрөү. Планды өҙҙөрөү.*

**5.** *күсм.* Әрнеттереү, бик нығ ауырттырыу. *Туң тимер кулдарҙы өҙҙөрөп семетеп ала.* Ә. Байрамов.

**6.** *күсм.* Нимәнелер кешегә тәьҫир итерлек итеп ихлас башҡарыу, кешене тулҡынландырғыс эш эшләү; өҙөү. *Өҙҙөрөп бейеү. Өҙҙөрөп ҡарау. Өҙҙөрөп һандуғас һайрай.* ■ *Һауа саф һәм йылы. Ауыл осонда тальян гармун өҙҙөрә.* Д. Исламов. *Ҡарағаш .. ҡурайын алды ла өҙҙөрөп-өҙҙөрөп .. бейеү көйөн тарта башланы, ти* (Әкиәттән). / Аныҡ, киҫкен итеп башҡарыу, өҙөү (хәрәкәткә ҡарата). *Шәргиә йырлап бөткәс, башын артҡа ташлап көлдө лә өҙҙөрә баҫып китеп тә барҙы.* Я. Вәлиев.

◆ **Бәгерҙе** (*йәки* **йөрәкте, үҙәкте, эсте**) **өҙҙөрөү** нескә хис уятыу. *Зәйни гармунда көйҙәрҙе гәләмәт шәп уйнай, эстәреңде өҙҙөрә, ти.* И. Ғиззәтуллин. *Әминбәк барып, тәҙрәнән ҡараһа, өй эсендә йөрәкте өҙҙөрөп, скрипка уйнайҙар икән* (Әкиәттән).

**ӨҘҘӨРТӨҮ** *к.* **1.** *йөкм. ҡар.* **өҙҙөрөү** 1, 2. *Арҡанды өҙҙөртөү.* ■ *Һыҙғырт, ҡурай, үткән ҡайғыларҙы, өҙҙөрт, ҡурай, йөрәкәй ҡылдарын.* Ш. Бабич.

**2.** *ҡар.* **өҙҙөрөү** 4, 6. *Өҙҙөртөп ҡурайҙа уйнау.*

**ӨҘЛӨГӨҮ** (өҙлөк*г*) *к.* **1.** Шәбәйеп етер-етмәҫтән ҡабатлап ауырыу. *Егор ҡарт ауырыуҙан һуң .. өҙлөгөп, яҙға табан үлеп ҡуйҙы.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *күсм.* Ауыр хәлгә ҡалыу; киңгәү. *Күп яу менән һыҙланған ил өҙлөкмәй буламы?* М. Буранғолов.

**ӨҘЛӨК:** **өҙлөк булыу** *ҡар.* **өҙлөгөү** 1. *Мәүсилә ауырыуын Зиннурға һиҙҙермәй аяҡ өҫтө үткәрергә тырышып, өҙлөк булды.* Ә. Вахитов. *Ғәҙелшаны һалҡын тейгәндән өҙлөк булған хәлдә тағы больницаға килтерҙеләр.* Ф. Иҫәнғолов. **Өҙлөк тыуҙырыу** *ҡар.* **өҙлөктөрөү** 2. *Күп яуҙарҙа биреккән илдә өҙлөк тыуҙырһа, ул кешеләр Уралда торорлоҡ торлаҡ таба алмаҫ!* М. Буранғолов.

**ӨҘЛӨКТӨРӨҮ** *к.* **1.** Шәбәйеп етер-етмәҫтән ҡабатлап ауырытыу. *Саҡ йөрөгән кешене эшләтеп, өҙлөктөрәләр инде.*

**2.** *күсм.* Ауыр хәлгә ҡалдырыу; киңгәтеү. *Аслыҡ өҙлөктөргән балалығым ҡулдарыма килеп йығылды.* Р. Бикбаев.

**ӨҘЛӨКҺӨҘ** *с.* Бер-бер артлы оҙаҡ дауам иткән; бер туҡтауһыҙ. *Өҙлөкһөҙ эш. Өҙлөкһөҙ рәүештә.* // *Өҙлөкһөҙ илау.* ■ *— Мине бер ҡарт ҡаҙаҡҡа тормошҡа бирҙеләр. Ике йыл өҙлөкһөҙ иланым.* Ш. Шәһәр. *Ҡуҡтә ул ниндәй өҙлөкһөҙ үт,— тиҙәр,— хәлбуки һис бер болот та юҡ,— тиҙәр.* Ш. Бабич. *Алыҫта туп тауыштары ишетелә, мылтыҡ, пулемет өҙлөкһөҙ эшләй.* Д. Юлтый. **Өҙлөкһөҙ эш көнө** алмашлап ял итеп, эште туҡтатмай эшләү тәртибе.

**ӨҘЛӨКҺӨНӨҮ** *к. диал.* Өҙлөгөү.

**ӨҘЛӘН:** **өҙлән һалма** *диал.* ҡул һалмаһы [*ҡар.* **һалма** 1].

**ӨҘМӘЙ-ҠУЙМАЙ** *р.* Бер туҡтауһыҙ, өҙлөкһөҙ. *Ике кәзә бәрәсен мал тапап үлтергәйне, шуның өсөн Фатиманы өҙмәй-ҡуймай игәйҙәр.* Ж. Кейекбаев.

**ӨҘМӘҮ:** **өҙмәү ҙә ҡуймау** бер туҡтауһыҙ, өҙлөкһөҙ бер нәмәне туҡыу, тылҡыу. [*Кәримә:*] *Шул ауыл тигәнеңде өҙмәнең дә ҡуйманың.* Ф. Иҫәнғолов. [*Фәһим:*] *Уф, көскә котолдом. Иллә бәйләнсек тә инде. Бер һүҙҙе алдына алдымы, өҙмәй ҙә ҡуймай.* Ш. Бикҡол.

**ӨҘӨ** *и.* Урыны-урыны менән һаҙамыҡланып, өҙөлөп-өҙөлөп аҡҡан бәләкәй йылға.

**ӨҘӨК** I *и.* **1.** Нимәнеңдер өҙөлгән урыны. *Урмандар, үҙәндәр буйлап йүгерҙе егет, барып тапты: линияла булған бер өҙөк.* Б. Моҡамай.

**2.** *күсм. һөйл.* Ниндәйҙер эш-хәлдең бер урында туҡталышы. *Юлдыбикә әбей һис бер өҙөк ҡалдырмай, һүҙен береһе артынан икенсеһен теҙә бирә.* Т. Хәйбуллин.

**3.** Өҙөлгән, йолҡолған киҫәк. *Бау өҙөгө.* ■ *Йыртылған өлкән мамыҡ киҫәгендәй томан өҙөктәре тау башына табан үрмәләй.* Ғ. Дәүләтшин.

**4.** *күсм.* Һүҙ, яҙма һәм башҡа нәмәнең бөтөн булмаған бер өлөшө, киҫәге. *Шиғырҙың .. Ғәлиә апай күшкан өҙөгөн дәртләнеп-дәртләнеп һөйләп бирҙем.* К. Кинйәбулатова.

**5.** (*йәки* **юл өҙөгө**) Ҡар ирeү, һыу ташыу һ. б. сәбәпле юлдар насарланған мәл. *Юл өҙөк ваҡыт.* ■ *Яҙғы өҙөккә тиклем игенде ташып бөтөрөргә кәрәк.* З. Ураҡсин. *Яҙғы өҙөктәрҙә, баткаҡта колхозымдың күпме ашлығын шул юлдарҙан күпме ташыным.* Ә. Атнабаев.

**6.** Төрлө аҙыҡ-түлек бөтөп, ҡыйынға ҡалып торған етешһеҙ саҡ. *Яҙғы өҙөк.* // *Өҙөк ваҡыт.*

■ *Биксән ағай ҡытлыҡ күрмәй, яҙғы өҙөктә лә ике-өс сана бесәне була.* Р. Солтангәрәев. *Бигерәк өҙөк сағыбыҙ. Йүнле-башлы ашатыр нәмәбеҙ ҙә юҡ.* А. Карнай.

II *с.* **1.** Киҫәктәргә өҙөлгән, өҙгөләнгән. *Өҙөк бау. Өҙөк булыу. Мандолинаның ҡылы өҙөк.*

**2.** Ҡапыл ғына өҙөлгән; киҫкен. *[Айбулат] өҙөк эске бер тауыш менән: — Уны мин түләйемме ни?» — тине.* Һ. Дәүләтшина. *Ул өҙөк итеп кенә бер көлдө.* Д. Юлтый.

**3.** *күсм.* Өлөштәргә бүлгеләнгән, төрлө ерҙән өҙөп алынған, бәйләнешһеҙ. *Өҙөк фекерҙәр. Өҙөк хәбәрҙәр. Өҙөк һүҙҙәр.* ■ *Аяҡ аҫтындағы ҡар ҡорос кеүек сыңлап тора, .. күңелгә әллә ниндәй өҙөк тойғолар индерә.* Д. Юлтый.

**ӨҘӨК-ЙЫРТЫҠ** *с.* **1.** Төрлө ерҙән теләһә нисек өҙгөләнгән, йыртылған; өҙөлөп-йыртылып бөткән. *Өҙөк-йыртыҡ кейем. Өҫтөнә өҙөк-йыртыҡ сәкмән кейгән.*

**2.** *күсм.* Ҡыҫҡа-ҡыҫҡа итеп, төрлө ерҙән алынған, бер-береһенә бәйләнешһеҙ. *Өҙөк-йыртыҡ мәғлүмәттәр.* ■ *Юл буйында һөйләгән һүҙҙәр .. өҙөк-йыртыҡ ҡына булды.* Ж. Кейекбаев. *Сәлмән минең менән өҙөк-йыртыҡ ҡына һүҙ алмаша.* Ә. Вахитов.

**ӨҘӨКЛӨК** *и.* **1.** Эштә ваҡыт-ваҡыт булған тотҡарлыҡ; туҡталыш. *Заводтың бишенсе цехы ул йылдарҙа тәрән өҙөклөк менән эшләп килә ине.* М. Хәйҙәров. *Бер урындағы өҙөклөк икенсеһен, икенсеһе — өсөнсөһөн тыуҙыра.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1986, № 1.

**2.** Юл ҡалған, йөрөп булмай торған саҡ; юл өҙөгө. *Көҙгө юл өҙөклөгө.* ■ *[Моҡан] яҙғы юл өҙөклөгөндә сауҙа эштәрен туҡтатмаҫ өсөн кәрәкле тауарҙарҙы алдан алып ҡайта икән.* С. Ҡудаш.

**3.** Төрлө кәрәк-яраҡ йәки аҙыҡ-түлек бөтөп, ҡыйынға ҡалып торған етешһеҙ саҡ; өҙөк. *Яҙғы өҙөклөк.* ■ *Сөгөлдөр япрағы бешерәбеҙ. Ҡоро һыу инде, сәйнәрлек нәмәһе юҡ. Шул саҡ мин: «Ошо өҙөклөктән иҫән-һау ҡотолһаҡ, йәшәй белер инек»,— тип уйлайым.* Р. Низамов.

**ӨҘӨКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Өҙөклөккә, етешһеҙлеккә ҡалыу. *Бесән яғы өҙөкләнгән саҡ.*

**ӨҘӨК-ӨҘӨК** *с.* **1.** Өҙөктәрҙән торған; өҙөлөп бөткән. *Өҙөк-өҙөк еп.*

**2.** Тулы булмаған өлөштәргә бүлгеләнгән, бәйләнешһеҙ. *Өҙөк-өҙөк хәбәр.* ■ *Ике күҙе һаман ҡыҙҙа уның [Нигмәттең], йәйы килгән һайын өҙөк-өҙөк һүҙҙәр ҙә ҡушҡылай.* Б. Бикбай. *Һикәлтәле юлда үйҙар ҙа өҙөк-өҙөк була.* Ш. Насыров.

**ӨҘӨК-ТӨРТӨК** *с.* Бер ыңғай бармаған, йыш өҙөлгән, өҙөк-өҙөк (эш-хәлгә ҡарата). *Өҙөк-төртөк йоҡонан насар кәйеф менән торҙом.* С. Ҡудаш.

**ӨҘӨК-ҺУРЫҠ** *р. диал.* Урыҡ-һурыҡ. *Өҙөк-һурыҡ ашау. Өҙөк-һурыҡ йоҡлау.*

**ӨҘӨЛМӘҪ** *и.* Арҡыс-торҡос итеп эшләнгән ҡуҫҡар биҙәк (күберәк ҡорама биҙәк һалғанда ҡулланыла).

**ӨҘӨЛӨҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **өҙөү** 1, 2, 4. *Дошман тарафынан өҙөлгән оборона. Тартып өҙөлгән еп. Эләгеп өҙөлгән төймә. Бүректең ҡолаҡсыны өҙөлгән.* ■ *Сәгиҙә көлтәне бауынан ғына тотоп күтәргәйне, бау өҙөлөп, көлтә тўҙып китте.* М. Тажи. *Исхаҡ Айбулатҡа күҙ ҡыҫты ла һеңлеһен әүрәтеп, көпөһөнөң өҙөлгән төймәһен күрһәтте.* Һ. Дәүләтшина. *Аҡ ҡайындың .. биш тин аҡса ҙурлығындағы һары япрағы һиҙмәҫтән өҙөлдө лә тирбәлә-тирбәлә ергә төштө.* Ә. *Бикчәнтәев.*

**2.** Бер-береһенә йәки үҙ-ара бәйләнгән, тоташҡан нәмәләр айырылып, ярақһыҙға әйләнеү. *Элемтә өҙөлөү.* ■ *Март бурандары башланып китте, ваҡ ауылдар араһында юлдар өҙөлдө.* Б. Бикбай. *Директор менән агроном ҡыш буйы йоҡлап йөрөгәндәр ҙә, камил юл өҙөлөр ваҡыт еткәс, орлоҡ алмаштырыу иҫтәренә төшкән.* Ф. Иҫәнғолов. *Ир ҡанаты киҫелмәһә, юл өҙөлмәҫ ер-һыуҙа.* Х. Назаров.

**3.** Бер ыңғай барған төрлө хәл-ваҡиға, эш-хәрәкәт дауам ителмәй туҡталыу. *Йыр өҙөлдө. Һүҙ өҙөлдө. Гудок тауышы өҙөлдө. Уйын-көлкө өҙөлмәй.* ■ *[Сәгиҙә] күптән өҙөлөп торған көндәлеген дауам итергә булды.* М. Тажи. *Аҡбулаттан хат өҙөлдө. Бер аҙҙан мин уның һәләк булыуын ишеттем.* З. Биишева. *Михаил бая һөйләшеп өҙөлгән хәбәрҙе дауам итте.* Һ. Дәүләтшина. *Булған заман, .. кешеләрҙә һис ут өҙөлмәгән, ҡабынып ут ҡалған усаҡта.* Н. Нәжми. / Үҙ-ара мөнәсәбәт, аралағы бәйләнеш туҡтау. *Бәйләнеш өҙөлөү. Дуҫлыҡ өҙөлөү.* ■ *[Ситтә булһа ла] Өмөтбаев .. Өфөнән дә өҙөлмәй.* З. Шакиров. *Дөрөҫлөк еңде ялғанды — өҙөлгән дуҫлыҡ ялғанды.* Н. Нәжми.

**4.** Ниндәйҙер тәьминәттән мәхрүм булыу. *Аҡсанаң өҙөлөү. Аҙыҡ-түлектән өҙөлгән юҡ.* ■ *Саҡырылған ҡунаҡтар ҡайтып киткәс, Аҡназар иттән шыпа өҙөлдө.* Ғ. Дәүләтшин. *Александра Дмитриевнаның .. тоҙлаған кәбеҫтәһе, ҡыяр-помидоры йыл әйләнәһенә өҙөлмәй.* Б. Бикбай. *Һин мал көтһәң, ҡыш ҡар ярып, йәй ысыҡ кис. Өҙөлмәҫһең ит, һөт, майҙан иртәле-кис.* Н. Иҙелбай.

**5.** Ниндәйҙер эш эшләнеп бөтөү, хәл ителеү, тамамланыу. *Хәҙер арыштар етте. Унан бесән дә өҙөлөп бөтмәгән әле.* А. Таһиров.

**6.** Эш, план йәки билдәләнгән башҡа бер сара ваҡытында үтәлмәү. *График өҙөлөү. Эш өҙөлөү.* ■ *Карьер төҙөү эшенең биш йыллыҡ планы өҙөлдө.* Ғ. Шафиков.

**7.** Тереклек рәүеше туҡталыу. *Тоҡом өҙөлөү.* ■ *Шәмсиямал үлеп күп тә үтмәй, үпкә ауырыуы менән Хисбулланың да ғүмере өҙөлә.* Ф. Рәхимғолова. *Үлгән инде... Ҡөтмәгәндә шулай өҙөлә йыр, өҙөлә ғүмерҙәр.* Н. Нәжми.

**8.** Бик ныҡ әрнеп ауыртыу. *Ун бишләгән кешенең .. кейемен йыуа-йыуа билем ҡалманы. Әле лә билем өҙөлөп бара.* Һ. Дәүләтшина. *Оҙаҡ йөрөп ғәҙәтләнмәгән Тәнзиләнең аяҡтары өҙөлә генәләр инде.* З. Хисмәтуллин.

**9.** *күсм.* Ауыр ғазап кисереү, өҙгөләнеү; ҡайғырыу, яныу. *Хәбибә инәй бигерәк тә үҙенең .. һуғыш башланғандан туғыҙ ай элек кенә армияға алынған .. кинйә улы Зиннәт өсөн өҙөлдө.* Б. Бикбай.

**10.** Хәл ҡылымдың *-ып* формаһында ҡушма ҡылымдың беренсе компоненты булып; 1) «бик ныҡ» мәғәнәһен бирә. *Өҙөлөп көтөү. Өҙөлөп*

*һағыныу. Өҙөләп һөйөү.* ■ *Күпме кыйын күреп, күпме вайым, үкһеп-үкһеп өҙөлөп иланың.* Ш. Бабич; 2) «тәрән кисереш менән», «әрнеп» мәғәнәһен бирә. — *Бер көндө һыу буйында кер йыуғанда ирегеҙ хакында өҙөлөп-өҙөлөп һөйләгәнегеҙ хәтеремдә әле.* М. Тажи; 3) «ярһып, түҙемһеҙләнеп» мәғәнәһен бирә. *Маянһылыу, ниңә был тиклем өҙөлөп-өҙөлөп сыркылдай икән был тургай тип, абайлабырак караһа, уның аягына бәйләгән хатты күрҙе, ти.* «Куҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

♦ **Бауыр өҙөлөү** *кар.* **бауыр.** *Һалкын елдәрҙән өҙөлә бауырҙар.* М. Илбаев. **Өҙөлөп тороу** 1) бик нәҙек булыу. *Биле өҙөлөп тора;* 2) кемдер өсөн йән атып, өҙәләнеп тороу. **Йөрәк** (*йәки* **үҙәк, эс**) **өҙөлөү** 1) бик нык асығыу. *Йөрәк өҙөлөп, түҙер хәл калмағас, йә шул үлән өҙөп кабабыҙ.* Д. Юлтый. *Үҙәге өҙөлгәндә кабыр, тип, Маянһылыу биш-алты бөртөк булһа ла бауырһак ебәрҙе, ти.* «Куҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»; 2) бик нык әрнеү, әсенеү. *[Акназар] бик бала йәнле була, йәтимдәр өсөн эсе өҙөлә* (Әкиәттән). *Һары ла була һандуғас, өҙөлә йөрәк, артык һағынғас* (Халык йырынан). **Телдән өҙөлөү** көслө хис, ихласлык менән һөйләү. *Бигерәк тә әбейҙәр телдән өҙөлә: «Эй хоҙайым.. Йәш балаларҙың баштары китеп, утка инә бит, илаһым».* Һ. Дәүләтшина. **Эс-бауыр өҙөлөү** *кар.* **эс-бауыр.**

● *Әллә йүкә өҙөлә, әллә кайыш өҙөлә.* Әйтем.

**ӨҘӨЛӨШӨҮ** *к.* Үҙ-ара бәйләнеште, мөнәсәбәтте бөтөрөү. *Сафура ире менән ара өҙөлөшөү ошолор инде тип, ышанып ук бөткәйне, ул .. кайтып инде.* Б. Бикбай.

**ӨҘӨЛТӨҮ** *к. һөйл. кар.* **өҙөү** 11. *Билде өҙөлтөү.*

**ӨҘӨМ-ЙЫРТЫМ** *с. диал.* Өҙөк-йыртык.

**ӨҘӨМТӘ** *и.* Әҙәби әҫәрҙең йәки рәсми документтың билдәле бер максат менән айырым күсереп алынған өлөшө. *Китаптан алынған өҙөмтә.* ■ *Килтерелгән өҙөмтәләрҙең өсөһө лә халыктар дуҫлығы темаһына арналған.* Р. Ниғмәти.

**ӨҘӨМҺӨҘ** *с. диал.* Өҙлөкһөҙ.

**ӨҘӨНӨП-ЙОЛКОНОУ** *к.* **1.** Үртәнеп, үҙеңде үҙең өҙгөләү. *Ул [катын] өҙөнөп-йолконоп, асыулана-асыулана, комод тартмаларын, гардероб капкастарын шарт-шорт асып, кейенә башланы.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *һөйл.* Булыр-булмаҫ мөмкинлекте файҙаланыу. *Өҙөнөп-йолконоп матур кейенергә тырыша.*

**ӨҘӨНӨҮ** *к.* Булыр-булмаҫ мөмкинлекте файҙаланыу. *Өҙөнөп булһа ла, балаһын укыта.*

**ӨҘӨП-ЙОЛКОУ** *к.* **1.** Төрлө ерҙән тарткылау, йолкколау. *Кейемен өҙөп-йолкоп бөтөргән.*

**2.** *күсм.* Төрлө ерҙән, теләһә кайһылай алыу. *Әҫәрҙә кешеләр, вакиғалар өҙөп-йолкоп түгел, тулы, асык итеп һүрәтләнергә тейеш.* Ә. Харисов.

**ӨҘӨП-ЙЫРТЫУ** *к.* **1.** Төрлөсә өҙгөләү, йырткылау. *Күлдәкте өҙөп-йыртып бөтөрөү. Өҙөп-йыртып ташлау.*

**2.** *күсм. һөйл.* Тегенән дә бынан алыу; өҙөп-йолкоу. *Өҙөп-йыртып һөйләү.*

**ӨҘӨҮ** *к.* **1.** Көс менән тартып, өлөшкә бүлеү. *Арканды өҙөү. Епте өҙөү. Теҙгенде өҙөү. Тешләп өҙөү. Урталай өҙөү. Икегә өҙөү. Өҙә тартыу. Өҙөп ебәреү. Ат тышауын өҙгән.* ■ *Турысай танауын корш тартып, ургә бер-ике тапкыр ырғыны ла, тышауын өҙөп .. Камышлы күл буйына карай бәреп сыкты ла китте.* Т. Хәйбуллин. *Ошо күлдәр быгауҙарҙы өҙгән, мылтык тоткан, байрак күтәргән.* М. Кәрим. *Алпамыша, бушаған бармағы менән икенсе кулындағы сынйырҙы өҙөп, һыңар кулын да бушатып алды, ти* (Әкиәттән).

**2.** Берәй нәмәне берекқән, тоташкан йәки үҫеп ултырған еренән тартып айырыу, йолкоу. *Алманы өҙөү. Еләкте өҙөү. Сәскәне өҙөү. Сәтләүекте өҙөү. Өҙөп алыу.* ■ *Егет, бер хисһеҙ генә үреләп, Хәтирәнең күҙе төшкән бөрлөгән тәлгәшен өҙөп алып, уға бирҙе.* Ф. Иҫәнғолов. *Һин әйеләп, өҙөп бирҙең миңә ике тамсы кайын еләген.* Р. Ғарипов. *Һалдат килеп, эттең муйынындағы төймәне шартлатып өҙөп ала* (Әкиәттән). / Ағзаны кәүҙәнән айырыу. *Бармакты өҙә сабыу.* ■ *Шрапнель капитандың башын өҙөп алып китте.* Д. Юлтый. *Убырлы карсык аттың бер аяғын өҙөп ала. Ат өс аяк менән генә һылтанлап юрта башлай* (Әкиәттән). *[Күсәк] ырыуымдың, атайымдың коно өсөн тип, йәнә өҙөп алды [Карагөлөмбәттең] һул колағын.* «Бабсак менән Күсәк».

**3.** Бер-береһенә йәки үҙ-ара бәйләнеп, тоташып торған нәмәләрҙе айырыу, яраҡһыҙ итеү. *Юлды өҙөү. Элемтәне өҙөү.* ■ *Котлояр Ырғыҙ ташкан сакта ауылдың волоска бара торған юлын ташкын өҙәсәге тураһында һөйләй.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** *хәрби* Алда торған кәртәне, каршылыкты емереп, бер урындан юл ярыу (нығытма, саф кеүек нәмәләрҙе). *Дошман оборонаһын өҙөү.* ■ *Немец ғәскәрҙәре фронтты өҙөп, беҙҙең ғәскәр артка сикте.* Д. Юлтый.

**5.** Бер ыңғай барған төрлө хәл-вакиғаны, эш-хәрәкәтте дауам иттерергә бирмәй туктатыу. *Йыйылышты өҙөү. Йырсының йырын өҙөү. Һөйләүсенең һүҙен өҙөү.* ■ *[Тимер:] Дәрескә .. йәштәр килер, укыуҙы өҙмәбеҙ.* Б. Бикбай. *Түҙмәнем, күҙ йәштәремде күҙҙәремдән өҙмәнем.* Ш. Бабич. *Ә ниңә ул беҙҙең әкиәтте өҙҙө.* Ғ. Сәләм. / Үҙ-ара мөнәсәбәтте, аралағы бәйләнеште туктатыу, бөтөрөү. *Бәйләнеште өҙөү. Дуҫлыкты өҙөү.* ■ *Дядя Гриша менән һаулашкан сакта Вася менән Айбулат үҙ-ара бәйләнеште һис тә өҙмәҫкә вәғәҙәләр бирешеп, дуҫлашып айырылыштылар.* Һ. Дәүләтшина.

**6.** Тәьминәттән вакытлыса мәхрүм итеү. *Аксанан өҙөү. Тамактан өҙөү.* ■ *— Мин һине утындан өҙмәм, .. һиңә ел-ямғыр теймәҫ.* М. Тажи. *«Хоҙай һуккыр! Рәхәтләнеп, һөтлө сәй эсербеҙ тигәйнем, ризыкты өҙә бит!» — тип, әсәйем бесәйҙе эләктереп алды.* Ғ. Минһажев.

**7.** Берәй эште эшләп бөтөрөү, хәл итеү, тамамлау. *Тимеркәй һаман тәмәкеһен өҙмәй тарта.* Д. Исламов. *Бер килгәндә эште өҙөп кайтмаһаң, .. тағы килергә кәрәк бит, тип уйланы [Ныязгол].* Һ. Дәүләтшина.

**8.** *күсм.* Эште, планды йәки билдәләнгән баш-

ҡа бер сараны ваҡытында үтәп өлгөрмәү. *Графикты өҙөү. Планды өҙөү. Эште өҙөү.*

**9.** Тереклек рәүешен туҡтатыу. *Ғүмерҙе өҙөү. Тоҡомдо өҙөү.* ■ *Һауаға атҡан уҡҡайым .. карлуғаскай ҡошто үлтергәнсә бер дошмандың йәнен өҙһәсе.* Салауат Юлаев. *[Ҡарағөләмбәт] тоҡомон ҡыпсаҡтарҙың өҙә шулай, ҡанында халайыҡтың йөҙә шулай.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**10.** *күсм.* Төрлө алдыҡ юлдар менән тартып алыу, үҙләштереү; ҡулға эләктереү (малды, аҡсаны һ. б.). *[Фатима:] Ҡаланы маҡта, ауылда тор икән ул. Баҙарына сыкһаң, .. барлы-юҡлы аҡсаңды өҙөп алырға ғына торалар.* Б. Бикбай. / Өлөш бүлеп биреү. *[Хәтирә — Нәғимәгә:] Минең бер нисә йыл эшләп, атайымдарға ярҙам иткем килә. Беләһең, улар үҙҙәренән өҙөп, мине ҡарай, уҡыта.* Ш. Бикҡол.

**11.** *күсм.* Әрнетеп, бик ныҡ ауырттырыу. *Һыуыҡ тимер ҡулды өҙә генә.* ■ *[Гөлйөҙөм] биленән өҙөп, киҫеп алған тулғаҡтан бөгөлөп, ергә ултырҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**12.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында төп ҡылым менән килеп, «матур итеп, ихлас» тигән мәғәнәне бирә. *Өҙөп йырлау.* ■ *Һандуғас тауышын ишеткәнегеҙ барҙыр. Ниндәй өҙөп һайрай ул, ниндәй оҫта сутылдай!* Н. Ҡәрип. *Пионерҙар колонnaһы .. барабан ыңғайына өҙә баҫып килә.* З. Биишева. *Йәштәр тыпыр-тыпыр бейей, көйгә баҫалар өҙә.* Б. Бикбай.

**13.** Хәл ҡылымдың *-п* йәки *-а* формаһында төп ҡылым менән килеп, киҫкенлек, ҡәтғилек мәғәнәһен бирә. *Өҙөп (өҙә) әйтеү. Өҙөп яуап биреү.* ■ *Был турала өҙә генә уйлағаным юҡ ине.* Н. Мусин. *Тыныслыҡ яҡлы ер халҡы, өҙөп әйтә бик хаҡлы: юҡ, булмаҫ, тоҡанмаҫ Ерҙә ҡанлы һуғыш.* Ш. Бикҡол.

♦ **Ауыҙҙан өҙөү** *ҡар.* **ауыҙ. Аяҡ эҙен өҙмәү** һәр ваҡыт, өҙлөкһөҙ килеп-китеп йөрөү. *Малиев-ҡанан аяҡ эҙен өҙмәгән Сергей Бородин менән дә [мине Әхмәтйәркәй] таныштырғайны.* С. Кулибай. **Бәгерҙе** (*йәки* **йөрәкте, үҙәкте, эсте) өҙөү** 1) бик ныҡ әрнетеү, әсендереү. *Гөлйөҙөмдөң бөтә хәлен һуҙһеҙ аңлаған Айбулат, үҙе лә йөрәк өҙөп барған әрнеү менән көрәшеп, тыныс булырға .. тырышты.* Һ. Дәүләтшина. *Башҡаларҙы һыҙландырған ҡайғы аҙмы өҙҙө минең үҙәкте?* Р. Бикбаев. *Ҡыш һалҡыны астар үҙәген, астар бәгерен өҙә, киҫәләр.* Д. Юлтый. *Нахаҡ һуҙҙар һөйләйҙәр ҙә эстәремде өҙәләр* (Халыҡ йырынан); 2) нескә хис уятып, яндырыу. *Аh, һинең тауышың .. ысын рәхәт, йәндәр ирей, ҡандар таша, бәгерең өҙә.* Ш. Бабич. *Шатлыҡ йырын йырлап, һандуғастар йөрәкәйемде өҙөп китәләр.* Х. Ғәбитов. *Ҡашы ҡара бер матур бар, эстәремде өҙәлер* (Халыҡ йырынан). **Енен өҙөү** *ҡар.* **ен** [1]. — *Көнөнә 30 гектар сапҡан кешене үлтереп маҡтап яҙҙығыҙ. Ә беҙҙә 80-ешәрҙе сабалар. Ана «Урал»да Әхмәткирәй карт менән улы Мөхәмәткирәй енен өҙөп эшләйҙәр.* Р. Солтангәрәев. **Етәккә бау өҙмәй йөрөү** *ҡар.* **етәк. Ҡыл өҙөрлөк тә хәл булмау** (*йәки* **ҡалмау**) *ҡар.* **ҡыл. Ҡырт өҙөү** *шул уҡ* **ҡырт киҫеү** (*ҡар.* **киҫеү** 10). **Өҙгәне лә ҡуйғаны** бик тап килеп, килешеп тора, тигән мәғәнәлә әйтелә. *Гөлгөнәнең ҡабатынҡы ирендәре уның түңәрәк, тулы йөҙөнә өҙгәне лә ҡуйғаны инде.* Д. Исламов. **Өҙә киҫеү** (*йәки* **тотоу**) *шул уҡ* **ҡырт киҫеү** (*ҡар.* **киҫеү** 10). **Өҙә һуғыу** 1) мәсьәләне хәл иткәндә тәүәккәл булыу, ҡырҡа хәл итеү. *Иргәле ни өҙә һуғып, ҡалаға сыҡты ла китте.* Н. Мусин; 2) *шул уҡ* **ҡырт киҫеү** (*ҡар.* **киҫеү** 10). *Янов яуап биргәнде лә көтмәйенсә өҙә һуҡты: — һинең колхозың районды артҡа һөйрәй.* Я. Вәлиев. **Өмөт өҙөү** *ҡар.* **өмөт. Тотҡан ерҙән өҙөү** *ҡар.* **өҙә һуғыу** 1 *[Бибихаят:] Ир тигәнең ир булһын, тотҡан ерҙән өҙһөн, тиҙәр ине беҙ йәшерәк саҡтарҙа.* Ә. Мирзаһитов.

**ӨҘӨШӨҮ** *ҡ.* **1.** *урт. ярҙамл. ҡар.* **өҙөү** 1, 2, 4, 8—9. *Арҡанды өҙөшөү. Алма өҙөшөү. Дошман оборонаһын өҙөшөү.*

**2.** Ҡаршы әйтешеп, тартышыу; талашыу. *Һатыусыларҙың ҡайһылары: «Юҡ, улай арзан була. Тейер хаҡын бир ҙә ал!» — тип өҙөшә.* З. Биишева.

♦ **Ара өҙөшөү** бәйләнеште, мөнәсәбәтте бөтөрөү; өҙөшөү. **Иҫәп өҙөшөү** мөнәсәбәтте бөтөрөү (ғәҙәттә үҙ-ара бурыслы кешеләргә ҡарата әйтелә). *[Ҡарлуғас:] Мин үҙ бурысымды үтәнем. Беҙ иҫәпте өҙөштөк, йырткыс әҙәм.* Б. Бикбай.

**ӨҘРӘЙЕҮ** *ҡ.* **1.** Ҡабарып тырпайыу (сәскә, йөнгә ҡарата). *Өҙрәйеп торған сәс.*

**2.** Асыуланып һырт ҡабартыу. *Бесәй өҙрәйеп, эт алдында тора.*

**3.** *диал.* Шоҡрайыу. *Өҙрәйеп ҡатыу.*

**ӨҘРӘЙЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **өҙрәйеү** 1, 2.

**ӨҘРӘЙТЕҮ** *ҡ.* Ҡабартып, тырпайтыу. *Сәсте өҙрәйтеү.*

**ӨҘҺӨТ** *и. диал.* Һөҙһөт.

**ӨҘӘ-ЙОЛҠА** *р.* **1.** Теләһә нисек тартҡылап, өҙгөләп. *Емеш өҙә-йолҡа сәс тарарға .. кереште.* З. Биишева.

**2.** *күсм. һөйл.* Төрлө ерҙән, теләһә ҡайһылай өҙөп алып. *Шәрифулла ишеткәнен өҙә-йолҡа һөйләп бирҙе.* Я. Хамматов. *Директор .. Афзалдың эше менән үҙенең кәнәғәт булыуын өҙә-йолҡа ғына булһа ла әйтеп бирҙе.* С. Агиш.

**ӨҘӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Ихлас күңелдән хәстәрлек күрһәтеү; өлтөрәү. *[Йыһан:] Әхмүш Фатимаһы .. саҙаҡаһынан ҡалдырмай, бүләгенән дә буш итмәй. Йыһан әбейем тип өҙәләнеп тора.* Х. Ибраһимов. *Әхтәмде күреү менән еңгәһе өҙәләнеп, табын әҙерләй башланы.* В. Исхаков.

**2.** *күсм.* Бик ныҡ борсолоу, тынғыһыҙланыу, өҙгөләнеү. *Егеттең күңеле өҙәләнә. Бер ни тиклем тынысланыр өсөн ул кеше аҙыраҡ йөрөй торған ерҙән, баҡса үтәһенән атланы.* Ш. Насыров. *Һыйыр ҙа яңғыҙһырапмы, көслө бурандан мы, өҙәләнеп-өҙәләнеп баҡырып ҡуйҙы.* Ғ. Дәүләтшин.

**ӨҘӘҢГЕ** *и.* Эйәрҙең аяҡты кейҙереп, баҫып ултыра торған өлөшө. *Өҙәңге тибеү. Өҙәңгегә баҫыу.* ■ *Ауыҙлыҡлап сапсан толпарҙарын, өҙәңгегә баҫты егеттәр.* Р. Бикбаев. *Хисмәтулла өҙәңге кейгән итек уксәһе менән аттың бөйөрөнә төрттө лә урманға ҡарай сапты.* Я. Хамматов.

**ӨҘӘҢГЕЛЕ** *с.* Өҙәңге ҡуйылған, өҙәңге таҡылған. *Көмөш өҙәңгеле эйәр.* ■ *Хасбулат олатай .. һандыҡтан көмөш өҙәңгеле, көмөш ҡашлы эйәр тартып алды.* З. Биишева.

**ӨҘӘҢГЕЛӘҮ** *к.* **1.** Өҙәңге тағыу, өҙәңге ҡуйыу. *Эйәрҙе өҙәңгеләү.*

**2.** Өҙәңге менән ат ҡабырғаһына тибеү. *Атайымдың аты артта ҡалышмаған, өҙәңгеләгән һайын алға атыла биргән.* Ғ. Ишбулатов.

**ӨҘӘҢЛӘҮ** *к. диал.* Буҙлау.

**ӨҘӘРЕМ** *и.* Юл өҙөлгән саҡ. *Көҙгө өҙәрем. Яҙғы өҙәрем. Юл өҙәреме. // Өҙәрем юл.* ■ *Килдем һиңә яҙғы өҙәремдә! Юл аҙабы хатта һиҙелмәй. Өҙәремдә юлдар өҙөлһә лә, һөйөү юлы бит ул өҙөлмәй.* Ғ. Дәүләтов. *Инйәр буйкайҙары ай өҙәрем* (Халыҡ йырынан).

**ӨЗКӨЛДӘҮ** *к. һөйл.* Баланы саманан тыш иркәләтеп, эргәһендә өйрөлөү; әпәүләү.

**ӨЗЛӘҮ** [1] *к.* **1.** Тамаҡ төбө менән көйләү. *Аралбай ялындырып торманы: уң терһәген тубығына сәнсеп, яңағына таяныp, ҡоро моң ғына итеп өзләп ебәрҙе. .. Тулҡынланып сыҡҡан моң бөтә мәжлестең һушын ала яҙҙы.* Ш. Шәһәр. / Ҡурай уйнағанда, тамаҡ төбө менән көй сығарыу.

**2.** Һыҙғырыу (елгә ҡарата). *Ҡыйыҡта өзләгән гинуар еленән биҙеп, Емеш .. Шәүрә менән сығып китте.* З. Биишева.

**ӨЗЛӘҮ** [2] *и.* Тамаҡ төбө менән көйләү сәнғәте. *Өзләү һөнәре.* ■ *Революцияға саклы заманда .. сеңләү һәм өзләү йәшәп килгән.* «Башҡорт халыҡ йырҙары», 1954.

**ӨЗЛӘҮСЕ** *и.* Өзләү һөнәренә эйә булған кеше.

**ӨЗӨЛДӘК** *и. диал. ҡар.* **сүрәкә** [2].

**ӨЗӨЛДӘҮ** *к.* Тамаҡ төбөнән өзләгәндәге һымаҡ өҙөк-өҙөк тауыш сығарыу (һыйыр малына ҡарата). *Үгеҙ өзөлдәй.*

**ӨЗРӘЙЕҮ** *к. диал.* Әзрәйеү.

**ӨЙ** *и.* **1.** Кеше тороp өсөн һалынған бина; йорт. *Ағас өй. Кирбес өй. Өй бурау. Өйгә инеү.* ■ *Өмөтбайҙың өйө кәкре-бөкрө ҡайындан һупалап ҡына һалынған.* Ғ. Дәүләтшин. **Аҡ өй** ҡунаҡ өйө йәки бүлмәһе. **Алғы өй** алты мөйөшлө өйҙөң аш-һыу яҡ бүлмәһе. **Алты мөйөшлө өй** ҡуша бурап һалынған ике бүлмәле өй. *Улар [Исмаҡаевтар] икәүләп ауыл советы урынлашҡан алты мөйөшлө өйҙөң төпкә яғына .. инеп китте.* Ж. Кейекбаев. **Алты босмаҡлы өй** *диал.* алты мөйөшлө өй. **Ҡара-ҡаршы өй** соланы уртала булған ике яҡлы өй. **Ҡунаҡ өйө** *ҡар.* **ҡунаҡ. Ҡушалы өй** *ҡар.* **алты мөйөшлө өй. Өй алды 1)** *диал.* ишек алды (*ҡар.* **ишек**). *Бороп керетеп өй алдына тура атты туғарттым* (Халыҡ йырынан); 2) *диал. ҡар.* **өй арты. Өй арты** өйҙөң солан яғынан башҡа өс яҡлап ятҡан әйләнә тирәһе. *Тулыбай үҙенең ғәҙәте буйынса өйө артына сығып, балсыҡтан яһалған һикәлтәгә ултырҙы ла ыштан кесәһенән насыбайын алып, танауын тултыра башланы.* Ғ. Дәүләтшин. **Өй башы 1)** өйҙөң ҡыйыҡы. *Ҡояш сыҡһа, ҡыҙаралыр өй башындағы ҡалай* (Халыҡ йырынан); 2) ҡыйыҡ менән түбә араһы; сарлаҡ. *[Ғариф ҡарт] ҡыйраған ыңғырсаҡҡа байтаҡ ҡарап торғас, берәй ҡулайлы нәмә тапмамты тип, өй башына менеп китте.* Б. Бикбай. **Өй бөтөрөү** өйҙө инерлек хәлгә килтереп, һалып бөтөрөү. *Быйыл өй бөтөрөп индек.* **Өй түбәһе** *ҡар.* **өй башы 1. Өй ултыртыу** өй һалыу. **Төпкө өй** алты мөйөшлө өйҙөң ҙур яғы. / Берәй маҡсатҡа хеҙмәт иткән йорт; бина. *Ҡарауыл өйө. Мал өйө. Юлаусылар өйө.* ■ *[Фельдшер — Хәйрушкә:] Ауылығыҙҙа уҡыу өйө бар, яңыса торорға өйрәнергә ваҡыт.* А. Карнай. *Вася менән Айбулат ялсылар өйөндәге урындыҡҡа йөҙтүбән һуҙылып ятып, бик оҙаҡ һөйләштеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Кемдер йәшәгән урын; бүлмә, квартира. *Өй йыһазы. Өйҙә ултырыу. Өй йыйыштырыу.* ■ *Һылыу ҡортҡа бер ағарып, бер ҡыҙарып ултырҙы ла, өйҙә сит кеше лә булғас, каршылыҡ күрһәтмәне.* Т. Йәнәби. *Бөтә өй ҡаласа йыйыштырылған.* Д. Юлтый. *Тамыр батырҙы туп тура мәскәй өйөнә килтергәндәр* (Әкиәттән).

**3.** (**йәки өй эсе**) *ҡусм.* Бергә йәшәгән ғаилә ағзалары йәки кешеләр. *Өй эсе менән байрам иттек.* ■ *Өс-дүрт өй бергәләшеп .. тапам эшенә тотоноп китте.* Һ. Дәүләтшина. *Өй эсе менән Сәфәрғәлеләргә көрьәнгә киттеләр.* Ф. Исәнғолов.

**4.** Кешенең төп йәшәгән урыны; ил, төйәк. *Өйгә ҡайтыу. Өйҙә тороу.* ■ *Ауылдан хат алмағаныма байтаҡ ваҡыттар булғанға хат, моғайын, өйҙән килгәндер тип уйланым.* Т. Йәнәби. *Юлай улы батыр ай Салауат баструкта ята, өйҙә юҡ* (Халыҡ йырынан).

**5.** Ҡайһы бер зоологик терминдар менән эйәлек һүҙ бәйләнеше яһап, йәнлек, бөжәктең һ. б. йорт тирәһендә йәшәгәнлеген күрһәтә. *Өй ҡарлуғасы. Өй ҡуяны. Өй турғайы.* ■ *Сыуал артында бер туҡтауһыҙ маҙа килтереп, өй сиңерткәһе серелдәй.* Я. Хамматов.

♦ **Аҫҡы өй** өйҙөң баҙ урынына файҙаланылған аҫҡы ҡаты. *Рәхимә алпан-толпан атлап аҫҡы өйгә төшөп китте.* Һ. Дәүләтшина. **Аулаҡ өй** йәштәрҙең күңел асып ултырыу өсөн аулаҡ бер өйгә йыйылған кисәһе. *Ауылда аулаҡ өйҙәрҙә .. уйнап йөрөгән саҡта күңелең төшкән ҡыҙ һиңә йылырак һүҙ әйтһә йәки тура килеп йылмайһа-нитһә, эһә, был ҡыҙ миңә әүрәү башлаған икән, тип ҡыуана торғайныҡ.* Т. Йәнәби. **Аш өйө** аш-һыу әҙерләр өсөн тәғәйенләнгән айырым аласыҡ. *Ут-күҙҙән һаҡланыу өсөн айырым аш өйө яһалған.* Ғ. Дәүләтшин. **Баҙ өй** ерҙе ҡаҙып эшләнгән торлаҡ. *Бабай балаларын үҫтергәс, ике улына ике баҙ өй ҡаҙҙырып, башҡа сығарып ҡуйҙы, ти* (Әкиәттән). **Бәләкәй өй** алты мөйөшлө өйҙөң алғы бүлмәһе. *Нәгим үҙе ҡыш көнө лә алдағы бәләкәй өйөндә тора.* Һ. Дәүләтшина. **Ер өй** *ҡар.* **баҙ өй. Ҡара өй** *ҡар.* **аш өйө.** *[Әхмүш] аяҡ тибеп: — Әсәй! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Ҡара өйҙәге Хафиза еңгә һиҫкәнеп китте.* Д. Юлтый. **Өй беренсә** өйҙән өйгә, өй һайын. *[Ғәлиә:] Был бер йәтим оҫтабикә .. өй беренсә ҡунаҡ итеп, хәйер-саҙаҡа биреп йөрөтәләр.* Ф. Рәхимғолова. **Өйҙән бушау** йорттағы ваҡ-төйәк эштән арыныу. *[Тимерғәле:] Әсәһе лә өйҙән бушамай.. Бына шуға уракты ыратып булмай ҙа ҡуя.* Һ. Дәүләтшина. **Өйҙә ятыу** эшһеҙ йөрөү. **Өй кейәүе** ҡыҙ өйөнә ингән кейәүгә әйтәләр. **Өй кешеһе** *ҡар.* **кеше. Өй күбәге** *ҡар.* **күбәк. Өй һаҡлау** өйҙән сыҡмай ултырыу. *[Ҡатын:] Был ҡанды эсһәгеҙ, һеҙгә арыҫландай егеттәргә әүерелеп, рәхәтләнеп һунарға йөрөргә, ә атайығыҙға өй һаҡлап ултырырға тура килә* (Әкиәттән). **Өй һыуытыу** тараҡанды бөтөрөү өсөн ҡышҡы һыуыҡта бер-нисә көнгә өйҙө ташлап сығып тороу. **Өй эйәһе**

дини хөрәфәтсә, өй эсендә күҙгә күренмәй йәшәгән бер зат.

**ӨЙБЕРЕНСӘ** *р.* *шул ук* **өй беренсә** (*кар.* **өй**). *Ауылға ҡайтар килеп тулды, .. өйберенсә йөрөп, халыҡты сходка ҡыуа башланылар.* Ә. Вахитов.

**ӨЙГӨЛӘҮ** *ҡ.* Тегендә-бында өйөү.

**ӨЙГӨС** *и.* Нимәнелер бер урынға өйә торған машина. *Сөгөлдөр өйгөс. Һалам өйгөс. Эҫкерт өйгөс. // Өйгөс машина.*

**ӨЙГҮБӘК** *и.* *шул ук* **өй күбәге** (*кар.* **күбәк**).

**ӨЙГҮБӘКЛӘНЕҮ** *ҡ.* *һөйл.* Өйҙән сыҡмау, кеше менән аралашмау. *Өйгүбәкләнеп ултырыу.*

**ӨЙГӘ** *и.* *этн.* Туйҙа «таҡыяға талашыу» өсөн сепрәккә тегелгән мал үпкәһе.

**ӨЙҘӨРӨҮ** [1] *ҡ.* *йөкм.* *кар.* **өйөү** [1] 1. *Бесән өйҙөрөү. Һаламды бер ергә өйҙөрөү.*

**ӨЙҘӨРӨҮ** [2] *ҡ.* *диал.* *кар.* **эйҙереү** [1]. *Сәңгелдәк өйҙөрөү. Һыргалаҡ өйҙөрөү.*

**ӨЙҘӨРТӨҮ** *ҡ.* *йөкм.* *кар.* **өйөү** [1] 1. *Ашлыҡ өйҙөртөү. Балсыҡ өйҙөртөү. Табаҡты өйҙөртөп ит килтереү.*

**ӨЙҘӘШ** *и.* **1.** Бер өйҙә йәшәгән төрлө ғаилә кешеләре (бер береһенә ҡарата). *Өйҙәш булыу. Өйҙәш итеү. Өйҙәш тороу.* ■ *[Бәҙри — Шәрифкә:] Әллә ире ҡайтмаһа, Йәмиләне өйҙәш итеп алайыҡмы икән?* М. Ғафури.

**2.** *күсм.* Үҙ иткән, яҡын нәмә. *Тау-таш — өйҙәш, ай менән ҡояш — юлдаш, ҡош-ҡорт — моңдаш булған уларға [Зөлкәрнәй менән Зөлхизәгә].* Н. Иҙелбай. *Тормоштоң мин төрлө сағын күрҙем, булды һөйөнөсө, нужаһы. Тик һөйөүем өйҙәш йәшәмәне, ә күңелдең булды хужаһы.* А. Игебаев.

● *Өйҙәш өс көн торһа, өй минеке, тиер.* Мәҡәл.

**ӨЙКӨЛДӨРӨҮ** *ҡ.* Төркөм итеп бергә йыйыу (кешене, малды һ. б.). *Өйкөлдөрөп малдарҙы көтөүгә ҡыуыу.*

**ӨЙКӨЛӨҮ** *ҡ.* Төркөм булып бер ергә йыйылыу; эркелеү. *Ә һарыҡтар ыҙғышмайҙар, дуҫ йәшәйҙәр, исмаһам. Бергә өйкөлөп, болонда йөрөй улар һәр ҡасан.* Ф. Рәхимғолова.

**ӨЙКӨЛӨШӨҮ** *ҡ.* *урт.* *кар.* **өйкөлөү**. *Өскә бөкләнгән хатты барыһы өйкөлөшөп ҡарап сыҡты.* З. Ураҡсин. *Оҙатҡан кешеләр ҡапҡа төбөндә өйкөлөшөп ҡарап ҡалды.* З. Биишева.

**ӨЙКӨЛТӨҮ** *ҡ.* *кар.* **өйкөлдөрөү**. *Өйкөлтөп ҡыуыу.*

**ӨЙКӨМ** *и.* Бергә тупланған күмәк нәмәләр йыйымы. *Ағас өйкөмө. Тал өйкөмө. // Өйкөм болот. Бер өйкөм ағас.* ■ *Улар күмәк ине ул төндә. Өмә менән килеп, кисләтеп, төн ҡундылар өйкөм төбөндә.* Ғ. Амантай. *Уҫаҡ араһындағы өйкөм муйыл ағастарын үткәс, .. туҡтап ҡалдыҡ.* Н. Мусин. *Ә күк йөҙөн өйкөм болот тағы ла алған ҡаплап.* Ш. Биҡкол. *Тауҙарҙан өйкөм-өйкөм болоттар күтәрелеп сыҡты, ямғыр һибәләргә тотондо.* М. Тажи.

**ӨЙКӨМЛӘНЕҮ** *ҡ.* *ҡайт.* *кар.* **өйкөмләү**. *Өйкөмләнеп болоттар аға.* ■ *Аҡлан уртаһында өйкөмләнеп үҫкән бөҙрә талдар тәьҫирләнеүҙе тағы ла көсәйтә төшә.* Н. Мусин. *Өйкөмләнеп томан ҡуйырғанда, мин уйланым һинең турала.* Ғ. Дәүләтов.

**ӨЙКӨМЛӘҮ** *ҡ.* Өйкөм итеп бер урынға йыйыу, туплау.

**ӨЙКӨМЛӘШЕҮ** *ҡ.* *урт.* *күмәкл.* *кар.* **өйкөмләү**. *Йәштәр таңға тиклем күңел асты. Офоҡ сите буҙарып, алһыулана башлағас ҡына ишеләре ишләшеп, яңғыҙҙары өйкөмләшеп таралыша башланы.* З. Ураҡсин.

**ӨЙКӘЛЕҮ** *ҡ.* **1.** Ышҡыла-ышҡыла иҙелеү, сейләнеп боҙолоу (тәнгә ҡарата). *Аяҡ өйкәлеү.* ■ *Аттарҙың елкәләре, түштәре бүре талаған кеүек өйкәлеп бөткән.* Б. Бикбай.

**2.** *күсм.* Иркәләнеп һырыныу, ышҡыныу. *Бесәй .. мырлай-мырлай һыйынып, башы менән өйкәлде.* Ҡ. Даян.

**ӨЙКӘТЕҮ** *ҡ.* **1.** Нимәнәндер ышҡытып, сейләндереү (тәнде).

**2.** *күсм.* Борсолдороу, әрнетеү (күңелде).

**ӨЙКӘТМӘ** *и.* Йылҡы (ҡайһы саҡта һыйыр) малының ҡойроҡ төбөндә була торған ҡысынма.

**ӨЙКӘҮ** *ҡ.* **1.** Бер нәмәне икенсе нәмәгә тызып ышҡыу. *Ауылға ҡаршы тауҙарҙың түбәһендә боландар мөһабәт мөгөҙҙәрен ҡарағайға өйкәп, ауыл яғына аңҡайып ҡарап торалар.* М. Тажи. *Елле көндәрҙә алма ағасы һелкенеп, алмаларын дегәнәккә өйкәй-өйкәй, уларҙан ҡанлы һут ағып тора башланы, ти* (Әкиәттән).

**2.** Ышҡый-ышҡый ҡабарсытыу, сейләндереү (тәнде). *Бара торғас, ул [Фатима] аяғын өйкәгәнгә итеген сисеп, ҡулына тотто.* Ж. Кейекбаев. *[Ҡаныш:] Сыға алмай ята, итек өйкәй, йылҡысының бөгөн аяғын.* Х. Ғәбитов.

**3.** *күсм.* Өҙләкһеҙ тынысһыҙлау, борсоу. *Йөрәкте өйкәү. Күңелде өйкәү. Эсте өйкәү.* ■ *Былай булһа, был бисә мине көн дә тишек кәмәгә ултыртасаҡ бит тигән шомло уй төштө күңелгә. Өйкәй ҙә өйкәй, малай, ағас йырған ҡорт кеүек.* З. Ураҡсин. *Аҡ толпарлы алтын ғүмеркәй! Хәтерләтмә һиғыш уттарын. Яу утында көйгән көбәктәй, ҡарт һалдаттың йәнен шул өйкәй.* С. Кулибай.

**ӨЙЛӨ** [1] *с.* Өйө, торор ере булған. *Ярай әле, хәлләнеп, өйлө булып алдыҡ.*

**ӨЙЛӨ** [2]: **бер өйлө** *бот.* һеркәһе лә, емшәне лә үҙендә булған. *Бер өйлө үҫемлектәр.* **Ике өйлө** *бот.* һеркәһе береһендә, емшәне икенсеһендә булған. *Ике өйлө кесерткән. Тирәк — ике өйлө үҫемлек.*

**ӨЙЛӨГӨҮ** *ҡ.* *һөйл.* Күп булып, бергә тупланыу; өйкөлөү.

**ӨЙЛӨГӨШӨҮ** *ҡ.* *һөйл.* *урт.* *күмәкл.* *кар.* **өйлөгөү**. *Өйлөгөшөп китеп барыу.*

**ӨЙЛӨК** *с.* Өй һалырға етерлек материал мәғәнәһен бирә. *Бер өйлөк таҡта. Бер өйлөк кирбес.* ■ *[Йомағол] ағып төшөп китте, бер ике-өс өйлөк бүрәнәнән һал һалдап.* Н. Нәжми.

**ӨЙЛӘ** *и.* **1.** Көн уртаһы; төш. *Өйлә етте. Өйләгә тиклем. Өйләнән һуң.* ■ *[Гөлбиназ — Фатимаға:] Килен, һин бөгөн һуңға ҡалма, өйлә ваҡытына ҡайт.* Ғ. Хәйри.

**2.** (*йәки* **өйлә намаҙы**) Төшкө аш алдынан уҡыла торған намаҙ. *[Мәзин:] Ҡарттар, .. тас ун ике булған. Әйҙәгеҙ, өйләне үтәп алайыҡ.* С. Агиш. *Ишанға мөрид булырға килгән суфыйҙар һәм тағы әллә кемдәр өйлә намаҙына ағыла башланы.* М. Ғафури.

**ӨЙЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Ҡатын алып биреү, ҡатынлы итеү. *Егетте өйләндереү.* ■ *Айсыуаҡ ҡарт*

*катыны менән Сурағолдо өйләндереү тураһында күп кенә кәңәшләшкәндең һуңында .. Сейәбикәне алып бирергә һүҙ беркетәләр.* Т. Хәйбуллин.

**ӨЙЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Ҡатын алыу. *Мин белгәндә Шафиҡ ағай арыу уҡ ологайғайны инде, әммә өйләнмәгәйне, һуңынан да яңғыҙ йәшәне.* Ә. Вахитов. *Нимә ҡылһа, шул килешә өйләнмәгән егеткә* (Халыҡ йырынан).

**2.** *кемгә.* Ир булыу, никахланыу. *Сәгиҙәгә өйләнгәс, Тәнзилә әбей Зыя Тайморзинды ла үҙ балаһы кеүек күрҙе.* М. Тажи.

● *Өйләнгәндә йырлай, өйләнгәс, илай.* Мәҡәл.

**ӨЙЛӘНЕШЕҮ** *к.* Ирле-ҡатынлы булыу. *Улар бер-береһен яратыштылар, өйләнештеләр. Аллы-артлы ике балалары булды.* Р. Низамов. *Өйләнешеү, күңелле туй үткәреү — бәхетле кешенең ғүмеренә бер генә килә торған зауыҡ нәмә бит ул.* Б. Бикбай.

**ӨЙМӘБЕР** *р. диал.* Өй беренсә (*кар.* **өй**).

**ӨЙМӘК** *и. кар.* **өйкөм.** *Ирәмәл, Әүәлек, Ямантау кеүек ҡеүәтле тау өймәктәре Көньяҡ Уралдағы иң мөһим һыу башы булып тора.* М. Хисмәтов.

**ӨЙМӘКЛӘТЕҮ** *к.* **1.** Өҫтө-өҫтөнә ҡатлап өйөү. *Ыҙғыр ел Ирәндек артынан ҡуйы ҡара болоттарҙы өймәкләтеп килтерҙе лә бөтә туғайҙарға, яландарға, тау итәктәренә таратты.* К. Мәргән.

**2.** Төркөм итеп, ҡыҫтап бер ергә туплау (кешене, малды һ. б.) *Өймәкләтеп ҡыуып алып китеү.*

**ӨЙМӘКЛӘШЕҮ** *к.* Өҫтө-өҫтөнә ҡатланып өйөлөү. *Ағиҙелдең төп үҙәненән шатыр-шотор килеп, һыйыша алмай, бер-береһенә төкәшеп, өймәкләшеп, өй дәүмәле боҙҙар аға.* Ф. Иҫәнғолов.

**ӨЙМӘКӘЙ** *с. диал.* Өймәләмә. *[Инәһе — Булатҡа:] Ҡара әле, ни арала биҙрәңде өймәкәй итеп алаһың һуң?* К. Кинйәбулатова.

**ӨЙМӘЛӘМ** *с. кар.* **өймәләмә.** *Өймәләм бер табаҡ ит.* ■ *Өс ағас тирелеп тә бөтмәне, Хөрмәттең һауыты өймәләм булды.* Ф. Иҫәнғолов. *Аш ташыған ҡатын тәрилкәләрҙе өймәләм итеп билмән алып килде.* З. Биишева.

**ӨЙМӘЛӘМӘ** *с.* Өҫтөнә сығарғанса өйөүле; өймәләм. *Өймәләмә биҙрә еләк. Өймәләмә булыу. Өймәләмә итеү. // Өймәләмә тултырыу.* ■ *Өлкән табаҡҡа өймәләмә итеп .. [һалып], ҡуй ите килде.* И. Көҫәпҡол.

**ӨЙМӘЛӘС** *и.* Бәләкәй генә өйөм. *Яҙғы ташҡын килтереп һалған ҡом өймәләстәрен ишә атлап, Ғатаулла таҡыр асыҡлыҡҡа килеп сыҡты.* Й. Солтанов.

**ӨЙМӘЛӘТЕҮ** *к.* Өймәләмә иттереү. *[Егет] тачканы өймәләтеп, тейәп алып китте.* Н. Иҙелбай.

**ӨЙМӘЛӘҮ** *к.* Нимәнеңдер тирә-яғынан өйөү. *Картуфты өймәләп күмеү. Өймәләп сығыу.*

**ӨЙӨГӨҮ** (өйөк*ә*) *к.* Енси яҡтан ҡауышыу (йәнлек, бөжәктәргә ҡарата). *Март айы күп кенә хайуандарҙың өйөгөү осоро.* ■ *— Кешене айыу ашамай торғайны ла баһа, нимәштән былай булды әле был? Әллә өйөккән мәле тура килдеме икән?* Я. Хамматов.

**ӨЙӨГӨШӨҮ** *к. урт. кар.* **өйөгөү.** *[Әбделнәғим:] Яман үкерешкән, шатыр-шотор ағас һынған тауыш ишетеп ҡалдым. Изгелеккә түгел был, мәйтәм, өйөгөшкән айыуҙарҙыр.* Н. Мусин.

**ӨЙӨК** *с. диал. кар.* **өйкөм.** *Өйөк ағас.*

**ӨЙӨЛДӨРӨҮ** *к.* Өйөп, өймәләмә итеү. *Табаҡты өйөлдөрөп, ит ҡуйыу.* ■ *Аш артынан тимер батмусты өйөлдөрөп, һөйәк ите индереп ҡуйылды.* Т. Хәйбуллин.

**ӨЙӨЛӨҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **өйөү** [1]. *Көрәп өйөлгән ҡар.* ■ *Һыулай өйөлгән игендең дымланыуы, былығып китеүе бар.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Өҫтө-өҫтөнә йыйылыу. *Тау булып өйөлөү. Өйөлөп ҡалыу. Өйөлөп ятыу.* ■ *[Сәлмән:] Утынымды алайым тип барһам, урынында көл өйөлөп ята* (Экиэттән).

**3.** Төркөм булып бергә йыйылыу, тупланыу. *Өйөлөп торған халыҡ.* ■ *— Ул атыш китте, атыш китте. Беҙ барыбыҙ ҙа йыйылып мөйөшкә өйөлдөк.* Ғ. Дәүләтшин.

**4.** *күсм.* Береһенә береһе өҫтәлеү. *Бөтә ҡайғы-хәсрәт Кәшифә апай елкәһенә өйөлдө.* Ғ. Аллаяров.

**ӨЙӨЛӨШӨҮ** *к. урт. кар.* **өйөлөү** 2, 3. *Өйөлөшөп тороу.* ■ *Өфө яғынан өҫтөн саң баҫҡан автобус килеп туҡтаны. Пассажирҙар, шаулашып, ишек төбөнә өйөлөштө.* Р. Низамов.

**ӨЙӨЛТӨҮ** *к. һөйл. кар.* **өйөлдөрөү.** *Өйөлтөп һалыу.*

**ӨЙӨМ** *и.* **1.** Өйөп ҡуйылған, өйөлөп ятҡан нәмәләр йыйымы. *Балсыҡ өйөмө. Көл өйөмө. Суп өйөмө. Таш өйөмө. Һалам өйөмө. Өйөм булып ятыу.*

**2.** Өҫтө-өҫтөнә өйөп, һыуыҡтан, ҡар-ямғырҙан һаҡлар өсөн һалам йәки башҡа нәмә менән ябылған йәшелсә. *Сөгөлдөр өйөмө.* ■ *Картуфты өйөмгә һалмай, тоҡҡа тултыралар.* М. Ғәли.

**3.** Ҡушарланып йәки һандар менән килеп, күләмде, күплекте белдерә. *Өс өйөм утын. Өйөм-өйөм кирбес. Өйөм-өйөм итеп һалыу.* ■ *Тере һыуҙы өйөм-өйөм әҙәм һөйәктәре уратып алған, ти* (Экиэттән).

**ӨЙӨР** *и.* **1.** Бер айғыр йөрөткән көтөү. *Өйөр булып йөрөү.* ■ *Йылҡы юшауҙа йөрөй, көтөүсе йоҡлай. Тик өйөр айғырҙары ғына колондарын эт-ҡоштан ҡурсып, өйөр тирәһендә урағылап йөрөй.* М. Буранғолов. *Был далала элек эркелешеп, өйөр малдар йөрөгән уйнаҡлап.* Ҡ. Даян. *Ҡул эйәһе .. йылҡы өйөрөнән иң яҡшы атты һайлап, Әбйәлилгә килтереп биргән* (Экиэттән).

**2.** Йыйнаулашып йөрөгән йыртҡыс йәнлектәр төркөмө. *Эт өйөрө.* ■ *Әлмәнләп йөрөгән ас сул бүреләре килеп сыға. Тотош өйөр ерәндең боттарына йәбешә.* Б. Бикбай. *Әле кисә генә бер өйөр бүре өс-дүрт көтөү һарыҡты боғаҙлап, йәрәхәтләп ташлағайны.* Ә. Чаныш.

**3.** *күсм.* Йыйнаулашҡан шаулы кешеләр төркөмө. *Халыҡ өйөрө.* ■ *Аймаҡтағы ерһеҙ ҡалған, ауылынан һөрөлгән ярлылар өйөр булып эшкә инәләр.* Т. Хәйбуллин. *[Әхмәҙи:] Эй, һеҙҙе! Өйөрөгөҙҙө бер епкә теҙеп, һыу эскеһеҙ итеп киҫергә!* Ж. Кейекбаев. / Йыртҡыс, шәфҡәтһеҙ кешеләр төркөмө. *Бандиттар өйөрө.* ■ *Яна башлаған совет танкыһы бөтә көсө менән дошман өйөрөнә ташланды.* Ғ. Рамазанов. *Алдылар беҙҙең яҡшы*

*еребеҙҙе, купис өйөрө килеп баҫты илебеҙҙе* (Бәйеттән). **Эт өйөрө** яуыз, йыртҡыс кешеләр төркөмөнә ҡарата әйтелә. *Яңы һүгыш хыял итә Трумендың эт өйөрө.* Ш. Бикҡол.

**ӨЙӨРЛӨ** *с.* **1.** Өйөр булып, өйөрө-өйөрө менән йөрөгән. *Өйөрлө йылҡы. Өйөрлө мал.*

**2.** *кәмһ.* Күп һандағы кешегә йәки нәмәгә ҡарата «теләһә ниндәй, һәр төрлө» тигән мәғәнәлә, һанға һуҡмай, кәмһетеп әйткәндә белдерә; йыйын. *Өйөрлө алйот. Өйөрлө эшкинмәгән. Өйөрлө әрәм тамаҡ.* ■ *[Байҙар:] Өйөрлө ялҡау, байгош, ерҙең бәрәкәтен ебәреп, илде астан һәләк итер бит.* Ф. Иҫәнғолов.

**ӨЙӨРЛӘП** *р.* Күпләп, өйөрө менән. *Өйөрләп йылҡы көтөү.* ■ *Ярлыға, әлбиттә, өйөрләп йылҡы ла, турһыҡлап ҡымыҙ ҙа, аҡ тирмәләр ҙә эләкмәгән.* З. Биишева.

**ӨЙӨРМӘ** [1] *и.* **1.** Ҡар, туҙанды өйөрөп, иҫкән ел һәм ел өйөрөүҙән бағана рәүешенә килеп, күсеп йөрөгән саң-туҙан, ҡар һ. б. өйкөмө. *Өйөрмә сығыу. // Өйөрмә ел.* ■ *Бишенсе көн инде буран ҡотора. Ҡарлы өйөрмә шул тиклем көслө, хатта күршеләге йорттар ҙа күренмәй.* З. Хисмәтуллин.

**2.** *диал.* Ҡойон. *Күк күкрәмәй ләйсән ямғыр килмәй, өйөрмәләр ҡупмай дауылһыҙ.* Ә. Таһирова.

**3.** *күсм.* Донъяны ҡуҙғытҡан, аҫтын өҫкә килтергән дәһшәтле, шаулы көс. *Һуғыш өйөрмәһе.* ■ *Осраған юлында бөтә ҡара көстәрҙе юҡ итеп, революция өйөрмәһе килде. Тормоштоң аҫты-өҫкә әйләнде, илдә яңы көндәр тыуҙы.* А. Карнай.

**ӨЙӨРМӘ** [2] *и.* Һыуҙың бер урында өйрөлөп ятҡан урыны; өйрөлмәк. *Өйөрмәгә эләгеү.* ■ *[Малайҙар] алмашлатып бейетеп ҡармаҡтарын, өйөрмәнән балыҡ аулайҙар.* Ғ. Амантай.

**ӨЙӨРМӘ** [3] *с. диал.* Өйкөмләнеп торған. *Өйөрмә тал уртаһынан күгәл өйрәк осто талпынып.* Ҡ. Даян.

**ӨЙӨРМӘЛӘНЕҮ** *к. ҡар.* **өйөрөлөү** [2]. *Өйөрмәләнеп сыҡҡан төтөндө ҡараңғылыҡ ашап бөтөрә бара.* Ш. Шәһәр.

**ӨЙӨРМӘЛӘҮ** *к. ҡар.* **өйөрөлдөрөү.** *Өйөрмәләп ел өрә.* ■ *Өйөрмәләп һауа тулҡындарын, һайрап оса күктә буҙтурғай.* Ғ. Амантай. *Өйөрмәләп, урам буйлап елдәр уҫал йыртҡыс һымаҡ ыжғыра.* Н. Нәжми.

**ӨЙӨРӨЛДӨРӨҮ** *к.* Көслө итеп, ойоҡһотоп, уралтып-уралтып өрөү, осороу; өйөртөү. *Баҫыуҙарҙың тупрағын ел күтәреп, өйөрөлдөрөп алып киткән.* Ә. Вәли.

**ӨЙӨРӨЛӨҮ** [1] *к.* Бер ергә йыйылыу; өйөргә йыйылыу. *Мал кәртәгә өйөрөлдө.*

● *Мал өйөрөлһә — яуҙыҡы, айырылһа — елдеке.* Мәҡәл.

**ӨЙӨРӨЛӨҮ** [2] *к.* Ойоҡһотоп, уралтып-уралтып өрөү һәм шул ел ыңғайына ураланып осоу. *Ҡар елдәре өйөрөлөп һуҡлығалар туң ярға.* Х. Назаров.

● *Ел сыҡмай суп өйөрөлмәй.* Мәҡәл.

**ӨЙӨРӨЛТӨҮ** *к. ҡар.* **өйөрөлдөрөү.** *Ел .. тар тыҡырыҡтарҙан киң майҙандарға ыжғырып килеп сыға ла өйөрөлтөп, ҡарҙарҙы әллә ҡайҙарға осороп алып китә.* З. Рафиҡов. *Буран өйөрөлтөп һуға. Күк менән ер бергә тоташҡан кеүек.* Һ. Дәүләтшина.

**ӨЙӨРӨМ** [1] *и.* Ҡайырымды ике яҡлап йыйып, килтереп һалған бесән өйөмө; күтәрем. *Бесәнде өйөрөмгә йыйыу.*

**ӨЙӨРӨМ** [2] *и. диал.* Ҡыраз.

**ӨЙӨРӨМ** [3] *и. диал. ҡар.* **өйкөм.** *Агиҙелкәйҙәрҙең аръяғында бер өйөрөм үҫкән тал икән* (Халыҡ йырынан).

**ӨЙӨРӨҮ** [1] *к.* **1.** Тарау малды ҡыуып, бер ергә туплау. *Йылҡыларҙы өйөрөп алыу.* ■ *Ырғыҙҙың .. Байсура тауы итәгенән әйләнгән бөгөлөшөндә көтөүселәр малдарҙы өйөрөп, төнгө яҡҡа әҙерләнеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Туҙҙырмай, бер ергә йыйыу. *Ат, меҫкенең, устағы икмәк һыныҡтарын ҡалын, йомшаҡ ирендәре менән һәрмәп, өйөрөп алып, ашыҡмай ғына сәйнәй.* Ғ. Ғүмәр.

**3.** *күсм.* Иғтибарҙы, күңелде йәлеп итеү, тартыу. *Йәйге тәбиғәттең матурлығы, байлығы бөтә кешене үҙенә өйөрһә лә, ҡышлауҙан йәйләүгә күсеп йөрөгән башҡорт халҡына был оҡшамаған.* Т. Хәйбуллин.

**ӨЙӨРӨҮ** [2] *к.* **1.** Бик көслө өрөп, уралтып-уралтып осороу; өйөрөлдөрөү. *Һалҡын ел өрә, ҡарҙар йүгерә, ап-аҡ ҡарҙарҙы буран өйөрә.* Х. Ғәбитов.

**2.** *диал. ҡар.* **өйрөлтөү** 2. *Иләп кенә өйөрөп сап шулай, йөҙөн йәнсей ҡурмә салғыңдың.* Р. Ғарипов.

**ӨЙӨРСӨК** [1] *и. ҡар.* **өйрөлтмәк** 1, 2. *Күк йөҙө хас сихри бер өйөрсөк, Ҡаҙыҡ йондоҙ — уның күсәре.* С. Әлибаев.

**ӨЙӨРСӨК** [2]: **өйөрсөк ҡуңыҙ** өйрөлөп йөрөй торған һыу ҡуңыҙы.

**ӨЙӨРСӨК** [3] *и. ҡар.* **өйрөлсәк** [1].

**ӨЙӨРТМӘ** *и. диал.* Урай.

**ӨЙӨРТМӘК** *и. диал. ҡар.* **өйрөлтмәк** 2.

**ӨЙӨРТӨҮ** [1] *к.* Бик көслө өрөп, уралтыу; ойоҡһотоп, өйөрөлдөрөү. *Ел ҡарҙы өйөртөп осора.*

◆ **Ут өйөртөү** 1) ҙур етеҙлек, ҡыҙыулыҡ, дәрт менән бер нәмә башҡарыу. *Береһе барабанға көлтә бирә, ут өйөртә, йырлап ебәрә.* Ғ. Мәсғүт; 2) дәрт биреү, елкендереү. *Бына хәҙер минең йөрәгемдә ут өйөртөп үйнай бер буран.* Ғ. Хәйри.

**ӨЙӨРТӨҮ** [2] *к.* Йылҡы көтөүен ҡамап, бер ергә туплау; өйөрөү. *Өйөртөп ҡыуыу.*

**ӨЙӨРТӘ** [1] *и. диал.* Ирте.

**ӨЙӨРТӘ** [2] *р. диал. ҡар.* **ҡапыл** 3.

**ӨЙӨРҺӘК** *с.* Өйөргә сабыусан, өйөр менән йөрөгән (ғәҙәттә йылҡы малына ҡарата әйтелә). *Бергә йөрөй торған өйөрһәк малдарға ла Ишәй менән Ҡушай тип әйтер булғандар.* М. Буранғолов.

● *Яман айғыр өйөрһәк.* Мәҡәл.

**ӨЙӨҮ** [1] *к.* **1.** Бер төр нәмәләрҙе бергә йыйып, билдәле бер тәртип менән өҫтө-өҫтөнә һалыу. *Балсыҡ өйөү. Таш өйөү.* ■ *[Индрил] янып бөтмәгән утындарҙы рәтләп өйөп, күмерҙәрен бер урынға йыйып, яндырып бөтөрөп ҡуя.* Д. Юлтый. / Бер ергә йыйыу, билдәле бер тәртип менән һалыу, өйөм яһау. *Ашлыҡ өйөү. Бесән өйөү. Һалам өйөү.* ■ *Ырҙынға өйгән эҫкерттәр һығалар ерҙең билен.* Р. Ниғмәти. / Бер урынға

йыйыу, күплэп һалыу. *Еңгэй егэрлерэк булһа, [көлдө] кыргарак ташлай, һалагырак булһа, ишек ауыҙына өйэ.* Ғ. Дэүлэтшин. *Йэнтимер .. өйҙэге китап-маҙарҙы шунда [өҫтэлгэ] килтереп өйҙө.* С. Агиш.

**2.** Кеше алдына берэй нэмэне күп итеп һалыу. *Өйөп ташлау.* ■ *Хисаметдин алдына куйылган балыктарҙы өйөп, аша ла аша тип, өсэүлэп кыҫтай башланык.* Ф. Иҫэнғолов. *Мэскэй камыр батыр алдына төрлө ашамлык өйөп куйган* (Экиэттэн). / Өймэлэм итеү. *Итте ике өлкэн кошта-бакка өйөп, урындык ситенэ шылдырҙылар.* һ. Дэүлэтшина. *Тэрилкэгэ кумэсеңде өйөп килтер.* Ш. Бабич.

**3.** *күсм.* Береһенэ береһен өҫтэү. *Зөлэйханы күрергэ йөрэк ашкына. Уның тураһында уй өҫтөнэ уй өйэ башлайым.* Т. Йэнэби.

◆ **Сүп өйөү** *кар.* **сүп** [1]. **Сүптэн күбэ өйөү** бэлэкэй ғэйепте ҙур итеп күрһэтеү.

● *Калала эш һөймэҫ, ауылда кэбэн өймэҫ.* Мэкэл.

**ӨЙӨҮ** [2] *к. диал. кар.* **эйеү** [3]. *Сэңгелдэк өйөү. Һыргалак өйөү.*

**ӨЙӨҮЛЕ** *с.* Өйөп куйылған, өйөп һалынған. *Кэмэн менэн Сэмэн эҙер утынды тауҙай итеп, арбаны шығырлатканса тейэп алдылар, э өйөүле утын бер ҙэ кэмемэне, ти* (Экиэттэн).

**ӨЙӨШӨҮ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **өйөү** [1]. *Бесэн өйөшөү. Таш өйөшөү.* ■ *[Сэгиҙэ:] Урыуын урманым, көлтэ өйөштөм.* М. Тажи.

**ӨЙРӨЛДӨРӨҮ** *к.* **1.** Бер нөктэ тирэлэй хэрэкэт иттереү; өйрөлтөү. *Орсокто өйрөлдөрөү.*

**2.** Бер урынды уратып хэрэкэт иттереү; өйрөлтөү; эйлэндереү. *Анфиса уны [Зөһрэне] косаклап, өйрөлдөрөп йөрөтэ.* Р. Ниғмэти. / Бер урында эйлэндереп бейетеү. *Өйрөлдөрөп алыу.*

**ӨЙРӨЛМЭ** *и. кар.* **өйрөлмэк.** *Эй, Инийэрем, Инийэрем! Үлсэү етмэҫ өйрөлмэңдэ епле орсоктай ойоп, .. тугай буйлап агаһың.* Ш. Ғэлин.

**ӨЙРӨЛМЭК** *и.* Һыуҙың бер урында өйрөлөп аккан урыны. *Өйрөлмэккэ элэгеү. Өйрөлмэк тартыу.*

**ӨЙРӨЛМЭКЛЭНЕҮ** *к.* Өйрөлмэк яһау, өйрөлөп ағыу. *Был урында йылга .. йэшелле-күкле булып, өйрөлмэклэнеп ята ине.* З. Биишева.

**ӨЙРӨЛМЭКЭН** *и. диал.* Эйлэнсек. *Баҙарҙың тап уртаһында берэү өйрөлмэкэн яһап алган да бер тапкырга ун бишэр тин акса алып, [халыкты] өйрөлтөп тора.* Ғ. Дэүлэтшин.

**ӨЙРӨЛӨП-СӨЙРӨЛӨҮ** *к.* Йэһэтлэп, йүгергелэп, бер нэмэ тирэһендэ уралыу. *«Ни булды, балам? Кем рэнйетте?» — тип [эсэһе] өйрөлөп-сөйрөлэ.* Н. Мусин.

**ӨЙРӨЛӨҮ** *к.* **1.** Бер нөктэ тирэлэй хэрэкэт итеү; эйлэнеү. *Койон эсендэ һауаның өйрөлөү тиҙлеге секундына 120 метрга етэ.* Д. Буракаев. *Туп тэгэрлэп киткэн дэ бер ерҙэ зырлап өйрөлэ башлаган* (Экиэттэн). / Бейегэндэ бер урында эйлэнеү. *Өйрөлөп бейеү. Өйрөлөп китеү.*

**2.** Бер тирэне уратып хэрэкэт итеү. *Икенсе аэроплан килеп сығып, тағы алдағы колонналар өҫтөндэ өйрөлэ башланы.* Б. Хэсэн.

**3.** *күсм. һөйл.* Кем йэки нимэлер тирэһендэ ығы-зығы килеү, ураланыу. *Эсэһе улы янында өйрөлэ.*

**4.** *күсм.* Туктауһыҙ ағыу, бер-бер артлы килеү (уй-фекергэ карата). *[Тайба эбей] ойок бэйлэй, э башында .. яманһыу уйҙар өйрөлэ.* Х. Мохтар.

**ӨЙРӨЛСЭК** [1] *и.* **1.** Балаларҙың зыр эйлэндереп ебэрэ торған уйынсығы. *Өйрөлсэк эйлэндереү. Өйрөлсэк уйнау.*

**2.** *һөйл.* Ултырыр өсөн ат, кэмэ һ. б. рэүешендэге урыны булған эйлэнеп йөрөмэле майҙансык. *Өйрөлсэктэ эйлэнеү.*

**ӨЙРӨЛСЭК** [2] *и. диал.* Эйлэнсек. *Өйрөлсэк булыу.*

**ӨЙРӨЛТМЭК** *и.* **1.** Елгэ каршы өйрөлэ торған уйынсык. *Өйрөлтмэк елгэ зыр эйлэнэ.*

**2.** Өйрөлөп, эйлэнеп тора торған кулайлама. *Һэр ишек һайын бармак һыйырлык тишек өҫтөнэ куйылган өйрөлтмэкте шылтыратып асып, [надзиратель] камера эсенэ карай.* һ. Дэүлэтшина.

**3.** *диал. кар.* **өйрөлмэк.**

**ӨЙРӨЛТӨҮ** *к.* **1.** Нимэнелер бер нөктэ тирэлэй хэрэкэт иттереү; өйрөлдөрөү. *Өйрөлтөп ебэреү.* ■ *Өйрөлт, эсэй, өйрөлт орсогондо, күпме моң бар һинең йырыңда.* Й. Солтанов. / Берэй куласа йэки тэгэрмэсте күсэрендэ эйлэндереү. *Өйрөлсэкте өйрөлтөү.* ■ *Баҙарҙың кап уртаһында берэү өйрөлмэкэн яһап алган да, .. ун бишэр тин акса алып, [халыкты] өйрөлтөп тора.* Ғ. Дэүлэтшин. / Бер урында эйлэндереп, бейетеү. *[Йэштэр Аллаярҙы] өйрөлтөп алып, бейетэлэр.* Ф. Иҫэнғолов.

**2.** Бер урында уратып, хэрэкэт иттереү; эйлэндереү. *Баш осонда яулыкты өйрөлтөп болгау.*

**3.** *диал. кар.* **уратыу** 2. *Утты өйрөлтөп ултырган малайҙар араһына .. Солтангэле лэ кушылгас, бэхэс ологайҙы.* Я. Хамматов.

**ӨЙРЭ** *и.* **1.** Ярма һалып бешергэн аш. *Борсак өйрэһе. Дөгө өйрэһе. Тары өйрэһе.* ■ *Бибеш тышта, аласыкта, киске тамакка өйрэ бешерер өсөн тары төйэ.* З. Биишева.

**2.** *диал.* Үлэн һалып бешергэн аш. *Балтырган өйрэһе. Һарына өйрэһе.* ■ *Ямантау аҫтында эрҙэнэ кыркканда һарына, балтырган, какы өйрэһе менэн генэ тамак ялгай торгайнык.* М. Тажи.

● *Өйө бейек, өйрэһе шыйык.* Мэкэл.

**ӨЙРЭК** *и.* **1.** Аяғы, муйыны кыҫка, сукышы яҫы, бармак аралары ярылы һыу кошо. *Ата өйрэк. Инэ өйрэк. Кыр өйрэге. Өй өйрэге. Өйрэк бэпкэһе. Өйрэк ите. Өйрэк йоморткаһы.* ■ *Камыш араһынан сипылдаша-сипылдаша, вак кына һап-һары өйрэк бэпкэлэре сыга башланы.* Ф. Иҫэнғолов. **Ак өйрэк** нэҙек оҙон моронло, яҡшы сума торған супайлы өйрэк (башы, аркаһы, койроғо кара, бүтэн ере ак). **Аласыбар өйрэк** сэүкэнэн ҙурырак сумғыс өйрэк (атаһының башы, муйыны, аркаһы күкшел кара, эсе, кабырғаһы ак). **Беле өйрэк** сыйылдап оса торған кыҙғылт башлы күгелйем өйрэк. Күгэл **өйрэк** һуна өйрэктең атаһы. *Күп тэ үтмэне тағы бер инэ өйрэк менэн күгэл өйрэк килеп төштө.* Х. Мохтар. **Күк өйрэк** сэүкэнэн ҙурырак сумғыс өйрэк (атаһының башы, муйыны кара, эсе, кабырғаһы ак, аркаһы күгелйем). **Кара өйрэк** кап-кара төҫтэге сумғыс өйрэк. **Кашкалак өйрэк** башында ап-ак кашкаһы булған оҙонорак текэ муйынлы кара өйрэк. **Кашык морон өйрэк** оҙон

киң моронло өйрәк (атаһы күкле-йәшелле, аҡлы--ҡаралы төрлө төҫтә). **Ҡылғойроҡ өйрәк** башы көрән, кәүҙәһе буҙ төҫтәге нәҙек муйынлы өйрәк. **Сумғалаҡ өйрәк** башы ҡыҙғылт көрән, кәүҙәһе күкшел буҙ төҫтәге эре өйрәк. **Сурәгәй өйрәк** һорсыбар төҫтәге бик ваҡ етеҙ өйрәк. **Сыпҡай** (*йәки* **тирҫаяҡ) өйрәк** яҡшы сума, ерҙә шылышып ҡына йөрөй торған өйрәк (аяғы бик артта, бармаҡ араларында ярыһы юҡ, һәр бармағы тирәһендә ишкәктәре генә бар). **Һуна өйрәк** иң эре өйрәк.

**2. Өйрәктәр, өйрәк һымаҡтар** *зоол.* Өйрәк, ҡаҙ, аҡҡош һ. б. инген ҡоштар ғаиләһе атамаһы.

● *Күлдә йөҙгән өйрәк ҡыр ҡәҙерен белмәҫ, ҡырҙа йөрөгән туғаҙаҡ һыу ҡәҙерен белмәҫ.* Мәҡәл.

**ӨЙРӘКМОРОН** *и.* Өйрәктекенә оҡшаған яҫы киң суҡышлы, йомортҡа һала торған һөтимәр хайуан (Австралия һәм Тасманияла йәшәй).

**ӨЙРӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Иреп йомшарыу, иҙелеү (ҡарға ҡарата). *Ылау көн битендә өйрәләнә башлаған юлдан битләүгә ҡарай яй ғына ҡуҙғалды.* Ф. Иҫәнғолов.

**ӨЙРӘНЕЛЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **өйрәнеү** 2, 3. *Өйрәнелгән һөнәр.*

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **өйрәнеү** 1. *Эшкә тиҙ өйрәнелде.*

**ӨЙРӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Берәй эште, һөнәрҙе башҡарырға күнекмә, белем алыу. *Ҡурай уйнарға өйрәнеү. Тегергә өйрәнеү. Трактор йөрөтөргә өйрәнеү. Шахмат уйнарға өйрәнеү. Бийма баҫырға өйрәнеү. Эшкә тиҙ өйрәнеү. Уҡырға өйрәнеү. Хисапҡа өйрәнеү.* ■ *[Өйрәнсек] бигерәк тә моңһоҙ нәмә булған икән. Өйрәнеп ҡалырға теләмәгән бит, яуызың.* З. Биишева. *Ҡурай — ерҙә үҫкән үлән. Бик ябай булыуына ҡарамаҫтан, уға өйрәнеү өсөн ныҡышмалы эш талап ителәә.* Ғ. Сөләймәнов. *Тимашев .. үҙ ғүмерендә ауыр эш тотмаған бармаҡтары менән нисек атырға өйрәнгәндер — беҙ уға барыбыҙ ҙа гәжәпләндек.* Д. Юлтый. *Винтовканан тура итеп, өйрәндек беҙ атырға* (Халыҡ йырынан).

**2.** Берәй өлкә буйынса уҡып, танышып, тейешле белемгә эйә булыу, мәғлүмәт алыу. *Тарихты өйрәнеү. Инглиз телен өйрәнеү.* ■ *— Беҙ бөгөн метр системаһына күсергә ҡарар иттек. Иртәгә үк ул системаны өйрәнеү өсөн кружок асырға тейешбеҙ.* С. Агиш. *Миллионер Әхмәровта бер йылдан артығыраҡ эшләп, русса икмәк-тоҙлоҡ өйрәнеп, [Гәрәй] ауылға ҡайтты.* Б. Бикбай. *Айбулат, күп йылдар рус араһында йөрөп, русса һөйләргә бик яҡшы өйрәнгән.* Һ. Дәүләтшина. / Эш, һөнәрҙе үҙләштереү өсөн кемдәндер һабаҡ, күнекмә алыу. *Кешенән өйрәнеү.* ■ *[Һөнәрсе — Өйрәнсеккә:] Өйрәнергә килдеңме?.. Эйҙә, ултыр. Хәҙер үк бөтә серҙе асып һалам.* З. Биишева. *[Егет — батшаға:] Үҙем эшләгән бөтә эште мин атайымдан өйрәндем* (Әкиәттән). *Ф. Ҡудашева тағы ла матурыраҡ йырҙар өйрәнеп, тамашасыларҙы шатландырыу теләге менән йәшәй һәм ижад итә.* М. Садыҡова.

**3.** Нәмәнең асылын, мәғәнәһен тәпсеп тикшереү аша асыҡлау, белеү. *Алдынғы тәжрибәне өйрәнеү. Тәбиғәтте өйрәнеү. Фольклорҙы өйрәнеү. Халыҡтың этнографияһын өйрәнеү.* ■ *Һөнәрсе хәҙер теләгәнсә тауҙар, далалар гиҙә, тәбиғәттең яңынан яңы серҙәрен өйрәнә.* З. Биишева.

**4.** Ниндәйҙер эш-хәлгә ғәҙәтләнеү. *Һылыу ҡортҡа, ҡарты мәрхүм бар саҡта уҡ еңмеш булып өйрәнгән, .. һаман да үҙ һүҙен һөйләй.* Т. Йәнәби. *[Батша:] Мин алтын ҡалаҡ менән ашап өйрәнгәнмен* (Әкиәттән). **Яман өйрәнеү** нимәгәлер ғәҙәтләнеп, шуны көҫәү. *Үпмәй ҙә генә тиеп үпкәләмә, үпһәм, ауыҙым яман өйрәнә* (Халыҡ йырынан). / Ниндәйҙер шартҡа, хәлгә күнегеү. *Меңгегә өйрәнмәгән ат. Өйрәнмәгән юл.* ■ *Улар аршын менән [үлсәргә] өйрәнгән.* С. Агиш.

**5.** Үҙ күреп, эйәләшеү; үҙләшеү. *Кешегә өйрәнеү.* ■ *Яратмай кейәүгә сыҡҡан кешеһенә Сәриә нисек кенә эйәләшергә тырышмаһын, өйрәнә алманы.* Я. Хамматов. *Яҙ көнө мин тағы ла өйрәнгән ҡаҙаҡ араһына уҡытырға киттем.* Т. Йәнәби.

♦ **Күҙ өйрәнеү** *ҡар.* **күҙ. Өйрәнмәгән тай кейек** ипкә, яйға килмәгән кешегә, ғәҙәттә шаяртыбыраҡ эйтелә. *Еңгә, өйрәнмәгән тай һымаҡ, дерт--мерт иткән булды.* Б. Бикбай. *Байҙың ҡыҙы май кейек, өйрәнмәгән тай кейек* (Халыҡ йырынан).

● *Өйрәнгән яу һуғышырға яҡшы.* Мәҡәл. *Һыуға инмәй йөҙөргә өйрәнеп булмай.* Мәҡәл.

**ӨЙРӘНЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **өйрәнеү** 4, 5. *Хәҙер ул [Юлия] бындағы халыҡ менән шундай өйрәнешеп бөттө, уларҙы үҙ туғандары кеүек күрә.* Һ. Дәүләтшина.

**ӨЙРӘНСЕК** *и.* Эшкә, һөнәргә башлап өйрәнеп йөрөгән кеше. // *Өйрәнсек малай. Өйрәнсек токарь.* ■ *Сәлимгәрәй эш рәтенә тиҙ төшөнгәне өсөн өйрәнсеген маҡтаны.* Я. Хамматов. *Өйрәнсек приказчиклыҡҡа, контролёрлыҡҡа өйрәнергә тейеш.* С. Агиш.

**ӨЙРӘТЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **өйрәтеү.** *Ат тышауға өйрәтелгән. Балалар сит телдә һөйләшергә өйрәтелә. Тегергә өйрәтелә. Тәбиғәт ғилеме өйрәтелә. Тәртипкә өйрәтелде. Уҡырға өйрәтелде. Эте өйрәтелгән.*

**ӨЙРӘТЕҮ** *ҡ.* **1.** Берәй эште, һөнәрҙе башҡарырлыҡ күнекмә, белем биреү. *Ҡурай уйнарға өйрәтеү. Тегергә өйрәтеү. Трактор йөрөтөргә өйрәтеү. Шахмат уйнарға өйрәтеү. Уҡырға өйрәтеү. Яҙырға өйрәтеү.* ■ *[Баяр:] Ана минең ике ҡыҙымды грамотаға өйрәтегеҙ.* М. Тажи. *Мин үҙем ҡамыр баҫырға биш һум биреп өйрәнһәм дә, Мәжәһитте буш өйрәтергә булдым.* Т. Йәнәби.

**2.** Берәй эшкә, һөнәргә эйә итеү, таныштырып, тейешле белем биреп, мәғлүмәтле итеү. *Руссаға өйрәтеү.* ■ *[Тимашев:] Мосол ман телен миңә лә өйрәтегеҙ әле.* Д. Юлтый. *Шәп икәнһең русса-ға, Шайкулзадам, кем өйрәтте, эйтсе? — тине ул әҙәм.* Ш. Бабич. *Үгәй әсәм мине урманға килтереп ташлатҡан. Шунда мине дейеү үҙ һарайына алып, сихырға өйрәткән* (Әкиәттән). / Малды йәки эт-ҡошто ниндәйҙер эш башҡарырға күнектереү. *Ат өйрәтеү. Эт өйрәтеү.* ■ *Күләүек буйында бер йәш егет ҡарсыға өйрәтә: өйрәк типтерә.* Ш. Шәһәр. / Юлын күрһәтеп, отоп алырлыҡ итеп төшөндөрөү. *Йыр өйрәтеү. Уйын өйрәтеү. Яңы бейеү өйрәтеү.* / Урынын, ерен һөйләп, йүнәлешен күрһәтеп, төшөндөрөү. *Юл өйрәтеү.*

■ *Ҡуй көтөүсе Ғәжәп Сәйеттең торған ерен өйрәтеп ебәргән* (Әкиәттән).

**3.** Нәмәнең асылын, мәғәнәһен кемгәлер еткереү, төшөндөрөү. *Алдынғы тәжрибәне өйрәтеү. Хәйлә өйрәтеү.* ■ *Беҙҙең уҡытыусыбыҙ .. политэкономия урынына, нисек байырға, нисек эксплуатацияларға өйрәтә торған «мәғишәт юлдары» тигән нәмә уҡытып йөрөгән.* С. Агиш. *Арымай-талмай йәштән өйрәтәмен ирек өсөн көрәш юлдарын.* Ғ. Амантай. / Нимәнелер аңға еткереү, аңларға, төшөнөргә ярҙам итеү. *[Ғәрәй — Шәүәлиғә:] Донъя өйрәтә ул ҡустым, төрлөһөнә өйрәтә.* Б. Бикбай. *[Сәғиҙә:] Кешеләр менән нисек эш итеү мәсьәләһенә килгәндә, уны тормош үҙе өйрәтер ул, Зыя Моратович.* М. Тажи.

**4.** Күнекмә, һабаҡ биреп, нимәгәлер күнектереү. *Тәртипкә өйрәтеү. Яҡшылыҡҡа өйрәтеү.* ■ *Тел белеп, аҡыл керә башлағандан һуң, әҙәп, тәртип өйрәтегеҙ балағыҙға.* М. Ғафури. / Ниндәйҙер эш-хәлгә ғәҙәтләндереү. *Тәмәке тартырға өйрәтеү.* ■ *Ҡаръяндар ҡырҙан килгән халыҡ, ятҡа һыйынып, ярарға тырышып йәшәйҙәр. Шул уларҙы сабырлыҡҡа өйрәткән.* Б. Бикбай. *[Ғәзимә:] Ҡуй, ҡуй, малды тышауға өйрәтмә. Бер тышаһаң, гел шуны көҫәй ҙә тора ул.* Һ. Дәүләтшина. **Яман өйрәтеү** иркен ҡуйып, ярамаған холоҡҡа ғәҙәтләндереү. *[Фатима:] Кино ла театр, Ҡадир, һин мине яман өйрәтеп бөтәһең инде.* Б. Бикбай.

**5.** Һалдатҡа алынған йәки алына торған кешеләрҙе хәрби эшкә күнектереү. *Һуғыш ваҡыты булғас ни, беҙҙе ялһыҙ-ниһеҙ өйрәтәләр.* Д. Юлтый. *Ырымбурҙа майҙың 15-нә тиклем туҡмай-туҡмай беҙгә һалдат уйыны өйрәттеләр.* Т. Йәнәби.

◆ **Аҡыл өйрәтеү** *ҡар.* **аҡыл.** *[Ғилман:] Минең биш бала, бишеһе лә бәләкәйҙәр. Аҡыл өйрәтер кеше юҡ. Һин, Юламан ағай, уларға күҙ-колаҡ булырһың инде.* З. Биишева.

● *Үҙе белмәгән кешене өйрәтер.* Мәҡәл. *Ялҡауға эш өйрәтһең, ул һиңә аҡыл өйрәтер.* Мәҡәл.

**ӨЙРӘТЕШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **өйрәтеү** 1—3. *Шахмат уйнарға өйрәтешеү. Һыбай йөрөргә өйрәтешеү.*

**ӨЙРӘТТЕРЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **өйрәтеү.** *Тегергә өйрәттереү. Тышауға өйрәттереү. Тәртипкә өйрәттереү. Яҙырға өйрәттереү.*

**ӨЙСӨК** *и.* **1.** Һынған аяҡ-ҡулды ҡоршап, ныҡ итеп бәйләгән ҡабыҡ йәки башҡа нәмә; талыҡ. *Өйсөк һалыу.*

**2.** *диал. ҡар.* **таған** 2. *Өйсөк ҡуйып, ҡәбән ҡойоу.*

**3.** *диал.* Ауын. *Өйсөк менән ҡош аулау.*

**ӨЙСӨКЛӘНЕҮ** *к. төш. ҡар.* **өйсөкләү** 1. *Гөлйөҙөм еңгә аяғы өйсөкләнгән бөҙрә йөнлө ҡара бәрәс күтәргән.* З. Биишева.

**ӨЙСӨКЛӘҮ** *к.* **1.** Ҡош-ҡорт, һарыҡ-кәзәнең һынған аяғына өйсөк (1 мәғ.) һалыу; талыҡлау. — *Кәзәнең аяғын өйсөкләп ебәргәйнем, төҙәлде лә китте.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *диал. ҡар.* **таганлау** 2. *Кәбәнде өйсөкләп ҡойоу.*

**3.** *диал. ҡар.* **осоҡлау** 1. *Сөйәл өйсөкләү.*

**ӨЙ-ТӨҘ** *и. йыйн.* Әйләнә-тирә, бөтә тирә-яҡ. *Был аңдан бар халыҡтың ҡото осҡан, өй-төҙҙә хайуанат ҡурҡып ҡасҡан.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ӨЙТӘМ** *с. иҫк.* Ҡыйыу, үткер. *Әй, Боягым үҙе ҡурҡәм, үҙе өйтәм ир ине.* «Боягым хан».

**ӨЙӘҘ** *[рус.* уезд*] и. иҫк.* **1.** Боронғо Рустә: ҡала һымаҡыраҡ округ һәм волостар.

**2.** Революцияға тиклемге Россияла һәм СССР-ҙа 1924—29 йылдарға, Башҡортостанда 1920 йылға тиклем булған, губернаға ҡараған административ-территориаль берәмек. *Өйәҙ ҡалаһы.* ■ *Ғабдулла Сәхибгәрәй улы Амантаев 1906 йылда Ырымбур губернаһы, шул уҡ өйәҙ, Ҡыпсаҡ волосы, Үрге Ҡунаҡбай ауылында ярлы, алдынғы ҡарашлы хәлфә семьяһында тыуған.* Ғ. Зөлҡәрнәйев. *Әй, большевик, эшең ҡылдың һәр өйәҙҙә: йәшен булдың, гөрзөй булдың буржуаға.* Ш. Бабич.

**ӨЙӘҘЕҮ** *к. диал.* **1.** *ҡар.* **өйәҙәү** 1.

**2.** *ҡар.* **ойоу** [3]. *Аҡҡола оҙаҡ ятып өйәҙегән аяҡтарына баҫа алмай сайҡалып, урынынан көскә күтәрелде.* Б. Бикбай.

**ӨЙӘҘӘК** *и. диал. ҡар.* **өйәнәк** [1]. *Ҡолаҡ эренләүгә татыран ҡыҫҡырыу, баш һыҙлауға өйәҙәк ойоҙоу, ҡоторған эт тешләүгә ырым әйтеү һымаҡтар халыҡ араһында күп.* Ғ. Амантай.

**ӨЙӘҘӘКЛӘҮ** *к. диал. ҡар.* **өйәҙәү** 1.

**ӨЙӘҘӘҮ** *к.* **1.** Салҡан әйләнеп, тора алмай аҙапланыу (малға, ҡош-ҡортҡа ҡарата). *Өйәҙәп ятыу.*

**2.** *ҡусм.* Яфа сигеү, ыҙалау. *Өйәҙәгән илдәр дауылда, өй әҙәйгән минең ауылда.* Р. Бикбаев.

**ӨЙӘК:** **өйәге әйләнеү** ҡорһағы менән өҫкә әйләнеү (шаңғытҡан балыҡҡа ҡарата).

**ӨЙӘЛӘҮ** *к. ҡар.* **өйәҙәү** 1.

**ӨЙӘН** *с. диал.* Ҡуйы, ялбыр. *Өйән ҡойроҡ саптар бейә буҫағаңа бүләккә* (Туй йырынан).

**ӨЙӘНӘК** [1] *и.* **1.** Ауырыуҙың ваҡыты-ваҡыты менән ҡапыл ғына көсәйеп китеүе, көсәйгән мәле; приступ. *Баш өйәнәге. Өйәнәге ҡуҙғалған.* ■ *Ҡайһы саҡта баш ауыртыу өйәнәк формаһында ҡапыл башлана.* М. Ғатауллин.

**2.** Тартыштырып, һушты алып, ҡапыл йыға торған ауырыу; быума. *Фәриҙә еңгә клубҡа аяҡ баҫҡаны юҡ ине, эшкә лә сыҡҡаны юҡ: ҡулына эш тотһа, йәнәһе, өйәнәге тота.* Ҡ. Ибәтуллин.

◆ **Өйәнәген әйләндереү** *һөйл.* берәй эште етеҙ тотоноп, емереп эшләү. *[Мотал — Яппарға:] Мин эш кешеһемен. Бер тотонһам, эшеңдең өйәнәген әйләндереп сығарырмын.* М. Хәйҙәров.

**ӨЙӘНӘК** [2] *и. диал.* Бил һөйәге.

**ӨЙӘНӘКЛЕ** *с.* Өйәнәк [1] (2 мәғ.) ауырыулы.

**ӨЙӘНӘКЛӘҮ** *к.* Өйәнәк [1] (2 мәғ.) ауырыуы ҡуҙғалыу.

**ӨЙӘҢКЕ** *и.* Тал һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған бейек ағас. *Бөҙрә өйәңке. Ҡара өйәңке.* ■ *Беҙҙәй һыуҙы, өй алдын эрһеҙ ағас өйәңке.* Ә. Вәли. *Беренсе ҡар уйнап яуған төҫлө, өйәңкеләр ҡоя мамыҡын.* Ғ. Мәсғүт.

**ӨЙӘҢКЕЛЕК** *и.* Өйәңкенән генә торған ағаслыҡ. *Инеш буйындағы өйәңкелектә ҡарға тауыштары яңғырай.* З. Ғәлимов.

**ӨЙӘР** *и.* Йылға булып шаулап, сылтырап аҡҡан ҡар йәки ямғыр һыуы. *Һаман әле шаҡ-*

*тай калын катлау булып яткан кар аҫтында өйәрҙәр сылтырап ага.* Х. Мохтар.

**ӨЙӘРЛӘНЕҮ** *к.* Өйәргә әйләнеү, өйәр булыу. *Өйәрләнеп яҙғы шишмә ургый, шаулап тора карағай урманы.* М. Тажи.

**ӨЙӘРЛӘҮ** *к.* Өйәр рәүешенә килеү, өйәр булыу. *Өйәрләп агыу.*

**ӨКӨ** *и.* Ябалаҡтар ғаиләһенә ҡараған буй ҡара таплы, һорғолт ерән төҫтәге ҡолаҡлы эре йыртҡыс ҡош. *Бесәй башлы өкө. Поляр өкө.* ■ *Өкө кеше ҡулына йәбешергә тырышып, тырнаҡлы табаны менән алға ынтылды.* Я. Хамматов. *Нимә күрһен көндөҙөн һары күҙе өкөнөң.* Ғ. Сәләм. **Өкө ябалағы** ябалаҡтар ғаиләһенә ҡараған буй-буй ҡара таптары булған ерән һоротөҫтәге өкөнән саҡ ҡына бәләкәй ҡолаҡлы йыртҡыс ҡош. **һаҙ өкөһө** *шул ук* **һаҙ ябалағы** (*кар.* **ябалаҡ**). **һуна өкөһө** *кар.* **һупайҙы.**

**ӨК-ӨК** *окш.* Өкө ҡысҡырғанды белдергән һүҙ. *Өк-өк кысҡырыу. Өк-өк килеү.*

**ӨКӨЛДӘҮ** *к.* Өк-өк итеү, өк-өк килеү. *Якында һупай өкө өкөлдәгәне ишетелә.* С. Кулибай.

**ӨКШӨМӘ** *с. диал.* **1.** *кар.* **бөтмөр** 1.

**2.** Мөнйөмә. *Өкшөмә кеше.*

**ӨКШӨНӨҮ** *к. диал.* Бөтмөрләү.

**ӨКШӨҮ** *к. диал. кар.* **мөнйөү** 3.

**ӨКШӘЙЕҮ** *к. диал.* Тексәйеү.

**ӨКӘЙ** *и. диал.* Маңлай сәсе.

**ӨЛБӨРӘТЕҮ** *к. һөйл.* Ныҡ туҙҙырыу, тетелдереү. *Өлбөрәтеп бөтөрөү.*

**ӨЛБӨРӘҮ** *к. һөйл.* **1.** Ныҡ туҙып, тетелеү. *Өлбөрәп бөтөү. Яка өлбөрәгән, йыртылырга тора. Күлдәктең ең остары өлбөрәгән.*

**2.** *кусм. кар.* **ябалаҡлау.** *Тын гына өлбөрәп, кар яуа.* С. Ҡудаш.

**ӨЛГӨ**[1] *и.* **1.** Бер үк төрлө йәки оҡшаш нәмәләрҙең араһынан алынған дана; үрнәк. *[Кәбир:] Туңга һөрөуселәр янына барып, .. бөтә баҫыуҙарҙың тупраҡ өлгөләрен алам.* Я. Вәлиев. / Ниҙеңдер дөйөм һыҙатын күрһәтерлек бер өлөш. *Йыйынтыкка Ғ. Амантайҙың әҙәби тәнкит мәкәләләренән кайһы бер өлгөләр индерелде.* Ғ. Зөлҡәрнәйев. *«Әбъяте мәгшукә» ысын мөхәббәт поэзияһынан бер өлгө ул.* Ә. Харисов.

**2.** *кусм.* Үҙенә ҡабул итерлек, артынан эйәрерлек миҫал; үрнәк. *Өлгө алыу. Өлгө булыу. Өлгө итеп куйыу. Өлгө күрһәтеү.* ■ *[Нәзирә — Ямакаевка:] Малайыңды ла боҙоп бөттөң.. Бер хулиган булып үҫә лә ул. Ни өсөн? Сөнки үҙендән өлгө ала.* Я. Вәлиев. / Ниндәйҙер сифаттың юғары дәрәжәһен күрһәткән миҫал. *Хеҙмәт өлгөһө. Ысын дуҫлык өлгөһө.* ■ *Сталинград өсөн һугыштың һәр көнө унарлаған, йөҙәрләгән батырлык өлгөләре тыуҙырҙы.* Ғ. Әмири.

**3.** Кейем бесеү өсөн әҙерләнгән үрнәк. *Өҫ кейеме өлгөләре.* ■ *Тегеү өлгөләре тәжрибә цехында әҙерләнә.* Ә. Таһирова. *Өс тигәс тә ни яман, өлгөһөҙ бескән тун яман* (Ҡобайырҙан). / Бер үк төрлө нәмәләрҙе бер рәүешле итеп эшләр өсөн әҙерләнгән үрнәк. *Яңы станок өлгөһө.*

**ӨЛГӨ**[2] *и.* **1.** Тәҙрә бүлкәләренең бер өлөшө; күҙгәнәк. *Бәләкәй өлгө. Ҙур өлгө.* ■ *Тәҙрәләр туң, ә ватык өлгөләренә сепрәк тыгылган.* И. Кинйәбулатов. *Ак келәттең тәҙрәһе һикһән һигеҙ өлгөлө* (Халыҡ йырынан).

**2.** *һөйл.* Өлөштәрҙән, киҫектәрҙән торған бөтөндөң бер өлөшө. *Һигеҙ өлгөлө кепкамды кырын кейеп, танау сөйөп йөрөй торгайным.* Р. Ғабдрахманов.

**ӨЛГӨЛӨ** *с.* Яҡшылыҡҡа өлгө булырлыҡ. *Өлгөлө тәртип.*

● *Өлгөлө һүҙҙең дә үлсәүе бар.* Мәҡәл.

**ӨЛГӨР** *с.* Етеҙ, еңел хәрәкәтле. *Ҡапыл төлкө бысҡы менән киҙәнә бит шеш ҡолакка. Ярай әле куян өлгөр, касып инә кыуаклыкка.* К. Ильясов. / Бөтә нәмәгә лә етешкән, бөтәһенә өлгөргән, етеҙ. *Өлгөр кеше.* ■ *[Хәбәрселәр] өлгөр халыҡ бит. Ҡайҙан да эҙләп табалар.* З. Биишева. / Булдыҡлы, уңған. *Өлгөр киленсәктәр яккан усаҡ, мейестәрҙән сыгып, ауыл өҫтөнә шыйыҡ ҡына күкшел төтөн тарала.* Ҡ. Аралбаев. *Кинйә улдары Сәлмән эшкә өлгөр, йомошка тилбер, һүҙгә тапкыр, уйга откор булган* (Әкиәттән).

**ӨЛГӨРГӘНЛЕК** *и.* Үҫештең юғары кимәле, камиллығы. *Политик яктан өлгөргәнлек. Өлгөргәнлек имтиханы тотоу.*

♦ **Өлгөргәнлек аттестаты** урта мәктәп белемен эйә булғанлыҡты раҫлаған таныҡлыҡтың 1944—1966 йылдарҙағы исеме.

**ӨЛГӨРЙӨМ** *с. диал.* Өлгөрөм.

**ӨЛГӨРЛӨК** *и.* **1.** Өлгөр, етеҙ булыу сифаты. *[Көсөгөм] Тузик исемле ине, өлгөрлөктә, һиҙгерлектә ул кош шикелле ине.* Т. Арслан.

**2.** Эшкә шәплек, уңғанлыҡ. *Өлгөрлөгө арка һында донъяһы бына тигән.* ■ *Ғәҙәттә, бөтә эш председателгә бәйләнгән, ул тырышһа — колхоз алда, тырышмаһа — артта, тиҙәр. Бәхәс юк, председатель кешегә етеҙлек, өлгөрлөк кәрәк.* Ә. Гәрәев.

**ӨЛГӨРӨЛӨҮ** *к. эйһ. кар.* **өлгөрөү** 1, 2. *Китеп өлгөрөлгән. Поезга өлгөрөлмәне.*

**ӨЛГӨРӨМ** *с. һөйл.* Бөтә эргә лә етешкән, өлгөргән. етеҙ; өлгөр. *Өлгөрөм кеше. Өлгөрөм булыу.*

**ӨЛГӨРӨҮ** *к.* **1.** Билдәле бер ваҡытҡа тиклем ниҙелер башҡарыуға өлгәшеү. *Яңы һалынган өй. Капка баганалары ултыртылган, капка куйып өлгөрмәгәндәр.* Н. Мусин. *Аталары үлеп киткән, кинйә улына кәләш алып бирергә өлгөрә алмай калган* (Әкиәттән). *[Кобора] барыһына ла өлгөрөргә тырышты: ашын да бешерҙе, керен дә йыуҙы, һыуын да ташыны.* Б. Бикбай. *Әкиәт яҙганда кыҙыу һөйләгән кешене яҙып өлгөрөп булмай теңкә корой.* Ғ. Амантай. / Тейешле ваҡыттан һуңламай ҡайҙалыр барып етеү. *Килеп тә өлгөргән.* ■ *[Бакый:] Миңә сәгәт тугыҙга дәрескә өлгөрөргә бит.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Файҙаланыуға яраҡлы кимәлгә етеү, әҙер булыу. *Аш өлгөргән. Сәй өлгөргән. Мунса өлгөргән.* ■ *Колхоздың Акбаштагы клубы бынан бер өс ай самаһы элек өлгөргән.* Ә. Вәли.

**3.** Бешеп етеү (иген, орлоҡ, емеш-еләк, йәшелсәгә ҡарата). *Оҙонгол башында ашап та, ташып та бөтмәҫлек булып карбуҙ-кауын өлгөрҙө.* З. Биишева. *Беҙҙең як — кырыҫ як, ашлык һуң өлгөрә.* Р. Низамов.

**4.** *кусм. һөйл.* Үҫеп буйға етеү. *Өлгөргән егет.* ■ *Шытыр өсөн орлок өлгөрә, һутланып та емеш өлгөрә, өлгөрә кыҙ, ирлек өлгөрә.* Н. Нәжми.

**5.** *күсм.* Тулы сифатҡа эйә булып етешеү *Өлгөргән мәсьәлә.* ■ *Ул [мөхәббәт] өлгөрһә, бер кемдән йәшереп булмай.* Б. Бикбай. *Их, йәшәһен кеше өлгөрөүе, их, йәшәһен тормош көлөүе.* М. Хәй.

**6.** *≠п* формаһындағы хәл ҡылымға йәки *≠рға* формаһындағы ҡылымға эйәреп, ниҙелер тиҙ генә башҡарыуға өлгәшкәнде белдерә. *Бына, .. һылыу әбейең хур ҡыҙы булып алырға ла өлгөргән.* Т. Йәнәби. *Ҡаҙан ҡайнап та өлгөрмәгән, Айыуголаҡ менән Тау батыр ҡайтып та төшкән* (Әкиәттән). / *≠п* формаһындағы хәл ҡылымға йәки *≠ырға* формаһындағы ҡылымға эйәреп эш-хәрәкәттең бик ҡыҫҡа ваҡытта, бик тиҙ булыуын белдерә. *Ер кибергә лә өлгөргән.* ■ *Тыуған, үҫкән илемдән яҙмышым йыраҡ ташлаһа ла һеҙҙе һағынып өлгөрәм.* Салауат Юлаев.

**ӨЛГӨРӨШ** *и. кар.* **өлгәш.** *Юғары өлгөрөшкә ирешеү. Йөҙ процент өлгөрөш биреү.*

**ӨЛГӨРТӨҮ** *к.* **1.** Билдәле ваҡытҡа эшләү, башҡарыу. *Сәғәт тугыҙға өлгөртөү. Эште ваҡытына өлгөртөү.* / *≠п* формаһындағы хәл ҡылымға эйәреп берәй эште тиҙ генә арала башҡарғанды белдерә. *Ирҙәр папирос тартҡанса, [Әфләтунов-тың ҡатыны] өҫтәлен әҙерләп тә өлгөрттө.* Ә. Вәли.

**2.** Файҙаланыуға яраҡлы кимәлгә еткереү; әҙер итеү. *Аш өлгөртөү. Тамаҡҡа әҙерләп өлгөртөү.* ■ *Ана аш бешереүсе кискелекте өлгөрткән. Котелоктарын күтәреп, һалдаттар ҡаҙан эргәһенә йыйыла.* Д. Исламов.

**ӨЛГӨРТӨШӨҮ** *к. урт. кар.* **өлгөртөү.** *Аш өлгөртөшөү.*

**ӨЛГӘШ** *и.* Уҡыусыларҙың дәресте үҙләштереү кимәле. *Класстың өлгәше түбән. Юғары өлгәш биреү.*

**ӨЛГӘШЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **өлгәшеү** 1. *Өлгәшелгән уңыш.*

**ӨЛГӘШЕҮ** *к.* **1.** Көс, тырышлыҡ менән ниндәйҙер һөҙөмтәгә ирешеү, шуны тормошҡа ашырыу. *Маҡсатҡа өлгәшеү. Уңышҡа өлгәшеү. Өлгәшкән дан.* ■ *[Кәүи — халыҡҡа:] Беҙ ошо йылдарҙағы ихтилал арҡаһында өлгәшкән иректе һәм тиҙлекте үҙебеҙгә ҙур ғәнимәт белеп, талаш-тартыштарҙы бөтөрөп, тыныс торорға тырышайыҡ.* Һ. Дәүләтшина. *Ягыу материалдарына ихтисад яһауҙа айырыуса өлгәшеүҙәр бар.* «Совет Башҡортостаның ун йылы», 1929.

**2.** Дәресте тейешенсә үҙләштереү. *Уҡыуҙа өлгәшеү.* ■ *[Булат:] Элек рус теленән йомшағыраҡ инем, хәҙер унан да өлгәшәм.* К. Кинйәбулатова.

**3.** Оҙон юл үтеп, ҡайҙалыр барып етеү. *Каруан Ашҡаҙарҙы түбәнләп, Ағиҙелгә өлгәшә лә, үрләп барып, Эйек буйына килеп төшә.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 8 ғинуар.

**ӨЛГӘШТЕРЕҮ** *к.* **1.** Көс, тырышлыҡ һалдырып, ниндәйҙер һөҙөмтәгә ирештереү, шуны тормошҡа ашыртыу. *Маҡсатҡа өлгәштереү.*

**2.** Дәресте тейешенсә үҙләштертеү. *Уҡыуҙа өлгәштереү.*

**3.** *диал. кар.* **өлгөртөү** 1.

**ӨЛДӨРЛӘҮ** *к. диал. кар.* **өлтөрәү** [1]. *Өлдөрләп тороу.* ■ *Оксана әбей мине .. өлдөрләп ҡаршы алды.* Ш. Янбаев.

**ӨЛКӨ** *и. диал. кар.* **өлпө** [1] 1. *Өлкө төбөнән тороп ҡасҡан ҡуяны күп Балҡан тау* (Ҡобайырҙан).

**ӨЛКӨЛДӘҮ** *к.* Һелкенә-һелкенә һалмаҡ ҡына йүгереү. *Эт өлкөлдәп, хужаһы артынан китте.*

**ӨЛКӨМ** *и.* Бер төптән сығып үҫкән ҡыуаҡ йәки үлән; өлпө. *Бүтәгә үләне өлкөмө.* // *Өлкөм ҡыуаҡ.* ■ *Өмә менән килеп, кисләтеп, төн ҡундылар өлкөм төбөндә.* Ғ. Амантай.

**ӨЛКӨМЛӘНЕҮ** *к.* Бер төптән сығыу, өйкөм булыу; өйкөмләнеү. *Өлкөмләнеп үҫкән ағас.*

**ӨЛКӘ** *и.* **1.** СССР-ҙағы эре административ-территориаль берәмек. *Силәбе өлкәһе. Партияның Өлкә комитеты.* / *һөйл.* Шул берәмектең төп үҙәгенә һәм ундағы етәксе ойошмаларға ҡарата. *Былай үҫә барһа, уның [Әминевтың] өлкәлә эшләү дәрәжәһенә күтәрелеүе лә ихтимал.* Б. Бикбай.

**2.** Ниндәйҙер үҙенсәлеге менән айырылып торған, нимәлер хас булған урын. *Мәңге туңлыҡ ятҡан өлкә.*

**3.** Яҡын ятҡан туҡымалары менән бергә берәй ағза алып торған урын йәки тәндең берәй төрлө билгеләре буйынса сикләнгән урыны. *Бауыр өлкәһе. Күкрәк өлкәһе.*

**4.** Эштең, тормоштоң, аң-белемдең айырым бер тармағы. *Алыш-биреш өлкәһе. Шиғриәт өлкәһе.* ■ *Ғабдулла Амантай .. фольклор өлкәһендә лә ғилми тикшеренеү эштәре алып барҙы.* Ғ. Зөлҡәрнәев.

**ӨЛКӘН** *с.* **1.** Кемгәлер ҡарағанда йәше артыҡ; оло. *[Мәйылбикә:] Үҙеңдән өлкән кешене үҙе алдында һис бер ваҡыт исеме менән атарға ярамай.* Һ. Дәүләтшина. / Туғанлыҡ, ғаилә мөнәсәбәте булған кешеләрҙең йәш яғынан ҙуры. *Өлкән ағай. Өлкән көндәш. Өлкән кәйенбикә. Өлкән еҙнә. Өлкән еңгә. Өлкән кейәү. Өлкән килен.* ■ *Ике арбалыҡ көлтәне бер арбаға тейәгән был кеше Тәукәй мулланың өлкән улы Сахап мәгзүм булып сыҡты.* Т. Йәнәби.

**2.** Оҙаҡ, күп йәшәгән; ҡарт. *Өлкән кеше.* ■ *Өлкән ҡарттар, апай, тип киләләр, ап-аҡ һаҡалдарын һалпайтып.* Д. Юлтый. / Үҫеш дәүерен үтеп, тейешле йәшкә еткән. *Өлкән һарыҡ. Өлкән һыйыр.* ■ *[Өмөтбай:] Минең өлкән атым юҡ та баһа. Яңыраҡ алған тайым саҡ ҡонанға сыға.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Күләме, дәүмәле билдәле бер саманан артыҡ; ҙур. *Өлкән зал. Өлкән самауыр. Өлкән һауыт.* ■ *Тауҙың аҫтында артыҡ өлкән булмаһа ла төпһөҙ тип хисапланған күл бар.* Ғ. Хәйри. *Ҡапҡа аръяғында урамдан һыртҡа ҡарай буйлатып һалынған өлкән келәт.* Ғ. Дәүләтшин. / Һаны билдәле бер саманан күп булған (төркөмгә ҡарата); күмәк. *Солтандың балалары тәүфиҡлы. Өлкән семья булһа ла, татыу торалар.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Кимәле, дәрәжәһе юғары булған. *Өлкән байрам. Өлкән эш.* ■ *— Быйыл аллаға шөкөр әле, балалар аҡ эсеп, әҙәм булып алды. Бүтән өлкән ҡайғы ла юҡ, шикелле.* Ғ. Дәүләтшин.

**5.** Йәмғиәттә тотҡан урыны, дәрәжәһе юғары булған. *Өлкән түрә. Өлкән ҡунаҡ.* ■ *Юғарынан әллә ниндәй өлкән урыҫ түрәләре килеп төштө.* Һ. Дәүләтшина.

**6.** Рәсми хеҙмәт вазифалары араһында юғарыраҡ дәрәжәле. *Өлкән инженер.* ■ *Взвод командиры өлкән лейтенант Әбделхәй Кәримовты маҡтаны.* Ә. Ихсан.

**7.** Юғарыраҡ баҫҡыстағы (уҡыу йорттарындағы класс һәм курстарға ҡарата). *Өлкән класс уҡыусыһы.* ■ *Сәхнәлә ауыл хужалығы институтының өлкән курстарында уҡыусы бер студент яҙған инсценировканы уйнайҙар.* Б. Бикбай.

◆ **Өлкәнгә ебәреү** *шул уҡ* **олоға ебәреү** (*кар.* **оло**). **Өлкән мал** *шул уҡ* **эре мал** (*кар.* **эре**).

● *Өлкән өйҙәге көлгәнгә кесе өйҙәге ыржайған.* Мәҡәл.

**ӨЛКӘНЛЕК** *и.* Кемдәндер, нимәнәндер өлкән (1—3 мәғ.) булғанлыҡ. *Йәш яғынан өлкәнлек. Һауыттың өлкәнлеге.* **Өлкәнлек итеү** өлкәндәрсә эш итеү. *Дилә уны [Тимербулатты] әле әүрәтеп, әле орошоп, үҙенсә өлкәнлек итте.* Һ. Дәүләтшина.

**ӨЛКӘНЛӘНЕҮ** *к. кар.* **өлкәнәйеү**.

**ӨЛКӘНЛӘҮ** *к. диал.* Ололау.

**ӨЛКӘНӘЙЕҮ** *к.* **1.** Оло йәшкә етеү; ҡартайыу. *Өлкәнәйгәнсе эшләп йөрөү.* / Ҡарттар төҫө инеү, оло сырайлыға әйләнеү. *Өлкәнәйеп китеү.*

**2.** Балалыҡ йәшенән үтеү; үҫеп етеү. *Юлдыбай өлкәнәйгәс кенә ҡарттың ҡулынан эш төштө.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *кар.* **ҙурайыу** 1. *Бергә йыйылалар ваҡ йылғалар, өлкәнәйеп көслө булырға.* Б. Вәлит.

**ӨЛКӘНӘЙТЕҮ** *к.* **1.** *һөйл.* Оло төҫө индереү; ҡартайтыу. *Уны ҡайғы өлкәнәйтте.*

**2.** *эйһ. ф. кар.* **өлкәнәйеү** 1.

**3.** *кар.* **ҙурайтыу.** *Буштан ғына эште өлкәнәйтеү.*

**ӨЛКӘР** [1] *и.*, **өлкәр йондоҙ** *астр.* Буға йондоҙлоғондағы өйөлөшөп торған яҡты йондоҙҙар төркөмө. *Өлкәр ҡалҡты.* ■ *Таң буҙара. Өлкәр йондоҙ батып, сулпан ҡалҡа.* А. Игебаев. *Етегән генә тигән ете йондоҙ өлкәрҙәрен ташлап китә алмай* (Халыҡ йырынан).

**ӨЛКӘР** [2] *и. диал. кар.* **олпат** 1.

**ӨЛӨКӨГӨН** *р. һөйл.* Кисәге көндән элек, ике көн элек. *[Әнисә] өлөкөгөн һөттө тук'з. Ғәфу иттеләр.* К. Кинйәбулатова.

**ӨЛӨКҺӘҮ** *к. диал.* Ныҡ һағыныу.

**ӨЛӨШ** *и.* **1.** Бөтөндөң бер киҫәге. *Бурыстың өлөшө. Бинаның өлөшө. Тәүлектең өлөшө. Икмәкте өлөштәргә бүлеү.* ■ *Ауылдың ярты өлөшө янған, өй нигеҙҙәрендә .. төтөн быҫҡый.* С. Кулибай. / Дөйөм күләмдән бүлеп, кемгәлер тәғәйенләнгән киҫәк йәки нәмә; пай. *Өлөш алыу. Өлөш биреү. Өлөш сығарыу.* ■ *Аш бешерһә, ҡарсыҡ бүлеп ҡуя, өлөшө тип гәзиз улымдың.* Т. Арслан. *[Был ҡатын] ике ҡуҡайҙе ике үгәй улына бирә. Үҙ балаһына өлөш теймәй* (Әкиәттән). **Шыбаға өлөш** шыбағаға сыҡҡан. *Табыш бүлешкәндә .. бер ырыу башлығы Һабыр ҡартҡа төйнәкте шыбаға өлөшкә сығарып биргән.* М. Буранғолов. / Аш ашағанда һәр кешегә тейгән бер киҫәк ит. *Шаулап ҡаҙ өмәләре үтте. Кистәрен ҡаҙ бүлергә, өлөш һогонорға күрше-күлән йыйылды.* Р. Низамов. / Берәй өҫкө йөҙҙөң, майҙандың билдәле бер участкаһы, киҫәге. *Беҙҙең ер шарының алтынан бер өлөшөнә ҡыҙыл әләм ҡаҙаны* совет иле. С. Агиш. *Ысынлап та, мин һыуҙанмын, ахыры, тукһан өлөш миндә — һыу, тиҙәр.* Н. Нәжми.

**2.** Уртаҡ, дөйөм һаналған эшкә индерелгән аҡса, һалынған хеҙмәт һ. б. *Иген мәгәзәйе бар. Унда һәр йыл һайын кешеләр үҙ игендәренән өлөш сығарып һала.* Һ. Дәүләтшина. *Халыҡ хужалығын үҫтереүгә Башҡортостан нефтселәре лә үҙ өлөшөн һала.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 14 февраль.

**3.** Бер бөтөн әҫәр, хеҙмәт, ғилемдең үҙ аллы бер бүлеге. *Мәҡәләнең тәнҡит өлөшө.* ■ *Марксизмдың бөтә төп өлөштәре — философия, политик экономия, фәнни коммунизм Ленин тарафынан үҫтерелде.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 10 апрель.

**4.** Тормош шарты менән билдәләнгән хәл; яҙмыш. *Геройҙарға халыҡ һәйкәл һала, һәйкәл — тик геройҙар өлөшө.* Ғ. Әмири. *Ни булһа ла булыр инде — өлөшкә тейгән көмөш.* А. Игебаев.

**5.** Һандар һәм һанды белдергән һүҙҙәр менән килеп, «мәртәбә, тапҡыр» тигән мәғәнәлә ҡулланыла. *Ике өлөш артыҡ.* ■ *Ер аҫтында — шахтала — эшләү күп өлөш ауырыраҡ булды, әлбиттә.* Ғ. Әмири.

◆ **Донъя өлөштәре** *кар.* **китға.** **Өлөшкә инеү** дөйөм мөлкәткә ҡатнашып, өлөш хоҡуғына эйә булыу. **Өлөш тейеү** туҡмалыу. *Бесәйгә өлөш тейә. Арҡаһына бер-ике рәт йоҙроҡ алғас, һике аҫтына ҡаса.* Ғ. Хәйри. **Өлөштө алыу** бер эш-ҡылыҡтан пасар һөҙөмтәгә килеү; кәрәкте алыу. **Өлөш әйтеү** килен күрһәткәндә, бүләк һалыу. *Килен килде, күрегеҙ, күрмәлеген бирегеҙ. Килен битен асабыҙ, өлөшөн әйтеп инегеҙ* (Туй йырынан).

● *Батыр өлөшө ерҙә.* Әйтем. *Ҡыҙ өлөшө — нағыш, килен өлөшө — һағыш.* Мәҡәл. *Яуға барған — өлөш алған.* Мәҡәл.

**ӨЛӨШЛӨ** [1] *с.* **1.** Мул төшөм, файҙа биргән; файҙалы. *Һәр яңы көн килеү менән тыуған ауылым үҙенең ябай, ләкин өлөшлө хеҙмәтен башлай.* Ҡ. Аралбаев.

**2.** Тормошо гел уңай барған; бәхетле. *Өлөшлө кеше. Өлөшлөләрҙән булыу.* ■ *[Аждаһа — батырға:] Батша ҡыҙын .. һин алырһың ул, һин өлөшлөһөң* (Әкиәттән).

**3.** *иҫк.* Боронғо хөрәфәт буйынса, үҙенә башҡа бер көскә, бәхеткә эйә булған; әүлиә затлы. *Үҙ ырыуында Алпамышаны ла, атаһын да өлөшлө тип йөрөткәндәр.* М. Буранғолов.

**ӨЛӨШЛӨ** [2]: **бер өлөшлө үҫемлек** *бот.* орлоғо бер бөтөндән торған үҫемлек. **Ике өлөшлө үҫемлек** *бот.* орлоғо ике яртынан торған үҫемлек.

**ӨЛӨШЛӘТӘ** *р.* Тулыһынса түгел, ниндәйҙер бер күләмдә. *Хоҙайбирҙиндың йөҙгә яҡын мәҡәлә, телмәр һәм докладтары был китапта өлөшләтә генә файҙаланылды.* Р. Ҡуҙыев. *БАССР граждандарының .. эшкә һәләтлеген тулыһынса йәки өлөшләтә юғалтҡанда .. материаль яҡтан тәьмин итергә хоҡуғы бар.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ӨЛӨШЛӘҮ** *к.* Нәмәне айырым өлөштәргә, киҫәктәргә айырыу. *Өлөшләп таратыу. Өлөшләп сығыу.* ■ *[Таибә әбей] Емеш ҡаҙандан табаҡҡа*

*алып һалған итте өләшләп бүлергә, һалма өсөн турарға кәрәште.* З. Биишева.

**ӨЛӨШСӨ** *и.* Табында аш (ғәҙәттә ит) өләшкән кеше. *Өләшсө өләшһәҙ кала.*

**ӨЛӨШСӘ** *и. махс.* Берәй төрлө матдәнең бик ваҡ киҫәге. *Зарядлы өләшсәләр. Матдә өләшсәләре.*

**ӨЛПӨ**[1] *и.* **1.** Бер төптән сығып, өйкөм булып үҫкән ҡыуаҡ йәки үлән; өйкөм. *Селек өлпөһө. Эрем өлпөһө.* ■ *Тимер юл канауынан сығып, өлпөләр араһына индек.* Д. Юлтый. *Өй артындағы .. әлморон өлпөһөнөң короған ботактарын кыркып ташланык.* Б. Бикбай.

**2.** Берәй нәмәнең ялбырлап торған осо. *Сәс өлпөһө.* ■ *Сук кайын .. өлпөләрен ергә тиклем әйеп, тынысһыҙ шаулап, уны [Көнһылыуҙы] оҙатып калды.* З. Биишева.

**ӨЛПӨ**[2] *с.* Ялбырлап торған; ялбыр. *Өлпө сәс.* ■ *Ҡояшка һыуһап, буйға һикергән өлпө сәсле муйылдар, бынау һаҙҙа ултырған түңгәктәр нимәһе менән йәмһеҙ һуң?* Ә. Вахитов. *Өлпө койрок, саптар һырт төлкө уйнаған Балкантау.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ӨЛПӨ**[3] *с. диал.* Маҡтансыҡ.

**ӨЛПӨЙ** *и.* **1.** Ялбырлап торған ос; өлтөк. *Камилә апайҙың йылтыр кара сәсе маңлайында өлпөй калдырып, түңәрәтеп кыркылған.* З. Биишева.

**2.** Һыу коштарының ҡойроҡ төбөндәге суҡ мамыҡ. *Ҡаҙҙың өлпөйө.*

**ӨЛПӨЛДӘҮ** *к.* **1.** Таралып, ялбырлап елпелдәү. *Өлпөлдәп торған үләндә аунау .. үҙе бер ғүмер.* Т. Килмөхәмәтов. *Өлпөлдәп кенә сығып килгән карағайҙар араһын утаныҡ.* Н. Мусин.

**2.** *кусм.* Йыш-йыш тибеү, леберләү (йөрәккә ҡарата). *Кешеләр төрлө булһа ла бер төрлө итеп: «Беҙҙең Хәлимә» тиҙәр. Ысын йөрәктән әйтә улар. Ә йөрәк белмәй өлпөлдәмәй.* Ш. Янбаев.

**ӨЛПӨЛДӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **өлпөлдәү** 1. *[Шакир] өҫтөндә йәм-йәшел кыяктар өлпөлдәшеп ултырған тупрак өйөмөнә караны.* Н. Мусин.

**ӨЛПӨЛӘНЕҮ** *к.* Өлпө[1] рәүешендә булыу. *Өлпөләнеп тороу.*

**ӨЛПӨЛӘҮ** *к.* Өлпө[1] рәүешенә килтереү. *Нәжипич .. суклап эшләнгән иңербауын өлпөләп кенә бәйләп ебәрергә ярата.* З. Биишева.

**ӨЛПӨРӘҮ** *к.* Туҙғып ялбырлау (сәс һәм башҡа нәмәгә ҡарата). *Әсә кыҙының .. өлпөрәп торған сәстәренән йомшак кына итеп һыйпай.* А. Игебаев.

**ӨЛПӘ** *с. диал.* **1.** *кар.* **өлпәк** 1. *Өлпә койрок. Өлпә тал.*

**2.** Өрпәк. *Өлпә кар.*

**ӨЛПӘЙЕҮ** *к. һөйл.* Өлтөк булып тырпайыу (сәскә ҡарата).

**ӨЛПӘК** *с.* **1.** Осо, башы өлпөләнеп торған; өлтөй. *Өлпәк койрок. Өлпәк курай. Өлпәк тал. Өлпәк булыу.*

**2.** *диал.* Өрпәк. *Өлпәк кар.*

**ӨЛПӘКЛӘҮ** *к.* **1.** Өлпәк хәлгә килтереү, өлпәк итеү. *Ел, ел һыҙғырма, етәр, кар болоттарын килтер, өлпәклә ағастарҙы, кар күмһен кыуактарҙы.* Ф. Рәхимғолова.

**2.** *диал.* Өрпәкләү. *Кискә табан өлпәкләп-өлпәкләп епшек кар яуа башланы.* Ғ. Ибраһимов.

**ӨЛПӘЛӘНЕҮ** *к. диал.* Өрпәкләнеү. *Өлпәләнеп кар яуды.*

**ӨЛПӘЛӘҮ** *к. диал.* **1.** Олпалау. *Өлпәләп кенә эшләү.*

**2.** Ойпалау. *Өлпәләп ташлау.*

**ӨЛТӨЙ** *с.* Тырпайып баҫып торған, өлтөк (сәс йәки башҡа нәмәгә ҡарата). *Әсә .. улының өлтөй сәстәрен иркәләп тарай, аркаһынан һөйә.* Н. Ғәлимов.

**ӨЛТӨК**[1] *и.* **1.** Ниҙеңдер ҡыҫҡа ғына булып тырпайып баҫып торған осо. *[Хәмит] түбәһендә калдырылған сәс өлтөгөн тырышып-тырышып төкөрөкләп һыйпаны.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *диал. кар.* **өлпөй** 2. *Ҡаҙ өлтөгө.*

**3.** *диал. кар.* **супай**[1].

**ӨЛТӨК**[2] *с.* **1.** Тырпайып баҫып торған, өлтөй (сәс йәки башҡа нәмәгә ҡарата). *Өлтөк койрок. Өлтөк сәс.* ■ *[Акназар:] Сеү, сеү, өлтөк баш, ирҙәр эшенә тығылып торма.* М. Тажи. *Бында өлтөк башлы тирәктәр үҫә.* Ш. Насыров.

**2.** *кусм.* Кешегә өлтөрәп тороусан; өлтөрәк (кешегә ҡарата).

♦ **Өлтөк ҡәләм** буяу өсөн осона ҡыҫҡа ғына йөн ҡуйылған бәләкәй таяҡ; кисточка. *Буяу күҙәнәгән асып куйып, өлтөк кәләм алды [бала] кулына.* Х. Ғәбитов.

**ӨЛТӨКЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Өлтөк итеү.

**ӨЛТӨКЛӘНЕҮ** *к.* Өлтөк рәүешендә булыу. *[Лида:] Сәсең, өлтөкләнеп торғанға хулиғанға окшап киткәнһең, улай йөрөмә.* Ә. Бикчәнтәев *Бөрөләнә бөҙрә талдар, өлтөкләнә камыштар.* М. Ғәли.

**ӨЛТӨЛДӘҮ** *к.* **1.** Еңел генә баҫып, етеҙ-етеҙ атлау; өлтәңләү. *Кейемдәрҙе катлап-катлап кейеп, билбау менән билде бик нык быуҙык та, кәртә артынан карға бата-бата оло юлға карап өлтөлдәп сығып киттек.* Б. Ишемғол.

**2.** *кар.* **өлпөлдәү** 1. *Өлтөлдәп яткан үлән.*

**3.** *кар.* **өлтөрәү**[1]. *Өлтөлдәп каршы алыу.*

**ӨЛТӨРЛӘҮ** *к. кар.* **өлтөрәү**[1]. *Ирен өлтөрләп, каршы алды Фатима.* Б. Бикбай.

**ӨЛТӨРӘК** *с.* Өлтөрәп тороусан [кешегә ҡарата].

● *Өлтөрәк ир олторак булыр.* Мәҡәл.

**ӨЛТӨРӘТЕҮ** *к.* Ситтәрен таушалдырып, тетеү. *Салбарҙың балаҡ остарын өлтөрәтеп бөтөү.*

**ӨЛТӨРӘҮ**[1] *к.* Ихлас күңел менән йүгергеләү; асыҡ йөҙ күрһәтеү; өҙәләнеү. *Өлтөрәп йөрөү. Өлтөрәп каршы алыу. Өлтөрәп тороу.* ■ *Сара апай самауыр куйырға ла өлгөргән, өлтөрәп йөрөп ята.* Ә. Вахитов. *Ирендәрен кыҫып тырыша Марат, йомоштарға йөрөй өлтөрәп.* Р. Ниғмәти.

**ӨЛТӨРӘҮ**[2] *к.* Ситтәре таушалып, тетелеү. *Һарғайып, бөкләнеп оҙак ятыуҙан өлтөрәй башлаған кағыҙҙар.*

**ӨЛТӨРӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **өлтөрәү**[1]. *Өлтөрәшеп тороу.*

**ӨЛТӘЙ** *с. диал.* Өлтөй, өлтөк. *Хөрмәт ағайым, көләмһерәп, минең өлтәй башымдан һыйпаны.* Н. Ғәлимов.

**ӨЛТӘЙЕҮ** *к.* Тырпайып баҫыу. *Сыңтимер Гөлгөнәнең һәр хәрәкәтенә, яулығы аҫтынан өлтәйеп күренгән сәс бөҙрәләренең нисек һелке-*

*неуенә тиклем һокланып карап ултырҙы.* Ш. Янбаев.

**ӨЛТӘЙТЕҮ** *к.* Тырпайтып баҫтырыу *Ул [тейен] һикергәндә аяктарын тырпайтып, йөнтәҫ койроғон өлтәйтеп ебәрә.* М. Ғималова.

**ӨЛТӘНЛӘТЕҮ** *к.* **1.** Еңел-еңел хәрәкәт иттереп, өтәләндереү; елтелдәтеү. *Өлтәнләтә баҫып атлау. Өлтәнләтә баҫып сығып китеү.*

**2.** *диал.* Өлтөрәтеү. *Үмәр карт өҫтөнә кәзәкей, бүрек кейгән дә ак ыштанының балактарын өлтәнләтеп, кунактарға каршы сыкты.* Һ. Дәүләтшина.

**ӨЛТӘНЛӘҮ** *к.* **1.** Еңел-еңел итеп, өтәләнеп баҫыу, елтелдәү. *Өлтәнләп килеп етеү. Өлтәнләп сығып китеү. Өлтәнләп йөрөп ятыу.*

**2.** *диал. кар.* **өлтөрәү** [2]. *Күлмәге өлтәнләп бөткән.*

**3.** *диал. кар.* **өлтөрәү** [1]. *[Миңһылыу еңгә] өлтәнләп йөрөп, мине һыйларға тотондо.* Р. Солтангәрәев.

**ӨЛТӘҪ** *с.* Өлпәйеп, ялбырлап торған; өлтөк, өлтөй. *Гөлдәр биҙәй оло туғайҙарын [Һакмарҙың], көнгә күйып өлтәҫ баштарын.* С. Кулибай.

**ӨЛТӘҪЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Өлтәҫ хәлгә килтереү, өлтәҫ итеү. *Кейемде өлтәҫләндергәнсә кейеү.*

**ӨЛТӘҪЛӘНЕҮ** *к.* Өлтәҫ хәлгә килеү; **өлтәҫ** булыу. *Өҫ-башы өлтәҫләнеп бөткән.*

**ӨЛТӘҪЛӘҮ** *кар.* **өлтәҫләндереү.**

**ӨЛФӨЙӘ** *и. кар.* **өрфөйә** [2].

**ӨЛФӘТ** *[ғәр.] и. иҫк.* **1.** Үҙ-ара яҡынлыҡ; дуҫлыҡ. *Өлфәт ширкәте* ■ *Ул Нәкиә йыр менән өлфәт каҙанмаҫ: тауышы аҙ.* Ш. Бабич. **Өлфәт булышыу** 1) дуҫ булышыу, интәшләшеү; 2) ярашыу, һөйөшөү

**2.** Бер һүҙлелек, берҙәмлек. *Өлфәттә — көүәт.*

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат, ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ӨЛФӘТЛӘШЕҮ** *к. иҫк.* Дуҫ булышыу, интәшләшеү. *Йөрөгән улар бер туған — кәрҙәш кеүек өлфәтләшеп.* С. Яҡшығолов.

**ӨЛӘМ** *и.* **1.** Туйыныҡлыҡ, ашарлыҡ өлөш. *Бер өләм икмәгем юк.*

**2.** *кусм. һөйл.* Үҙенә бер ғәҙәт, холоҡ. *Шаярыуҙы бер өләм итеп алған ул.*

**ӨЛӘМЛЕК** *и. кар.* **өләм** 1. *[Әбей:] Үҙебеҙгә еткән өләмлек һиңә лә етер әле.* Х. Ғиләжев.

**ӨЛӘМЛӘҮ** *к.* Өләмле итеү, өләм-өләм итеп бүлеү. *Өләмләп кенә биреү. Өләмләп ашаткас, бесән оҙакка етте.*

**ӨЛӘҢ** *и. диал.* Үләң. *Өләң әйтеү.*

**ӨЛӘСӘЙ** *и.* **1.** Атай *йәки* әсәйҙең әсәһе. *Гөлдәр өләсәһен әсәй тип йөрөтә. Уның үҙ әсәһе үлгән.* К. Кинйәбулатова. *Өй артында шаулай карт имән. Шул имәндәй ерҙә бөкрәйгән өләсәйем минең — карт инәм.* Ә. Вахитова.

**2.** *диал.* Әсәйҙән оло ҡатын-ҡыҙ (туғанлыҡ яғынан).

**ӨЛӘШЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **өләшеү.** *Килгән казачийҙарға мылтыҡ өләшелде.* З. Шәрҡи.

**ӨЛӘШЕҮ.** *к.* Өлөш-өлөш итеп бүлеп таратыу. *Аш өләшеү. Өләшеп биреү.* ■ *Беҙҙе „красный крест" палаткаһына алып инделәр.. йылы һурпа, дөгө буткаһы ашаттылар, яртышар шешә кыҙыл аракы өләштеләр.* Д. Юлтый. / Берәй нәмәне кеше һайын таратыу. *Бүләк өләшеү. Кәрт өләшеү.* ■ *Альков әллә кайҙан „Окопная правда" газетаһы алып килеп, вагондарға берәр номер өләшә һалды.* Һ. Дәүләтшина. *Бер вакыт карт, ни эшләптер, гөлдәрен күрше-күләнгә өләшә башланы.* З. Ураҡсин.

● *Акыл өләшкәндә йоклап калған* Әйтем. *Өйһәң, күп, өләшһәң, аҙ.* Мәҡәл. *Өләшә белгәнгә — өс өлөш, белмәгәнгә — бер ҙә юк.* Әйтем.

**ӨЛӘШСЕ** *и.* Өлөшләп ниҙер өләшкән кеше.

● *Өләшсегә өс өйрәк, алты һартка бер тартай.* Әйтем.

**ӨМБӨЛ** *и. диал.* Сөмөкәй.

**ӨММӘТ** *[ғәр] и. иҫк.* **1.** Халыҡ, милләт.

**2.** (*йәки* **мөхәммәт өммәте, мосолман өммәте**) *дини* Мөхәммәткә эйәргән халыҡ, мосолман халҡы. *[Староста:] Мөхәммәт өммәте ислам дине өсөн йәнен-тәнен аяманы.* Я. Хамматов. *Шулмы алла, һин пәйғәмбәр, беҙме өммәт, беҙме кол?* Д. Юлтый. **Өммәт ҡылыу** кемдеңдер юлына төшөрөү, кемдеңдер тәғлимәтен ҡабул иттереү, эйәрсене итеү. *[Һин, алла, беҙҙе] Мөхәммәт ғәләйәссәләмгә өммәт кылдың.* М. Өмөтбаев.

**ӨМӨТ** *[фарс.] и.* **1.** Теләгән эш-хәлдең киләсәктә булырына ышаныс. *Өмөт менән карау. Өмөттө юғалтыу. Өмөт биреү.* ■ *Ниндәйҙер өмөт менән йәшәлә ине әле, ул да өҙөлдө.* Р. Низамов. *Әйелеп кенә бөгөлөп йәшәһә лә, өмөт менән йөрөр ир кеше* (Халыҡ йырынан). **Аҡ өмөт** яҡты, матур өмөт. *Гөл-сәскәләр ак өмөттәр, якты таңдарҙы күреп, яңылышып ялкында янған, көлгә әйләнгән йөрәк!* Б. Ишемғол. **Өмөт бағлау** 1) *кар.* **өмөт бәйләү**; 2) ниндәйҙер эштән алдағы көндә яҡшы һөҙөмтә сығыр тип ышаныу. *Илселәр һәр ырыуҙан тиерлек һайланған. Халык уларға ҙур өмөт бағлап оҙаткан.* Ә. Вахитов. *Күпме өмөт бағлап, куҙ терәп торған комбайнды Әпсәләмов ғауға күтәреп, тартып алды.* Х. Ғиләжев. **Өмөт бәйләү** нимәнеңдер булырына ышаныу, өмөтләнеү. *Хәҙер муллаға бөтә өмөтөңдө бәйләп, хәйер биреүселәр ҙә һирәк.* Һ. Дәүләтшина. **Өмөт өҙөү** ниҙеңдер булырына ышанысты юғалтыу. *Сәпсектәргә ауыр көн килде: емдәр кар аҫтына күмелде! Кырҙа, болондарҙа ем эҙләүҙән өмөт өҙҙө улар, төңөлдө.* Д. Юлтый. **Өмөт һүнеү** ышаныс бөтөнләйгә бөтөү, нимәнәндер төңөлөү. *Өмөт һүнһә, гүмер һүнә, боҙ төшмәһен өмөтөңә.* Ҡ Даян.

**2.** Ниндәйҙер ышаныс бағлаған кеше йәки нәмә. *Йәлләйем.. Йәлләү ҙә, теләү ҙә бөттө. Актыкҡы өмөтөм, һуңғы кыуанысым — Зөлхизәм менән бергә бөтәһе лә юғалды.* З. Биишева.

□ **Өмөт итеү** 1) нимәлер булыр тип ышанып көтөү. *Килерҙәр тип өмөт итәм;* 2) ниҙәндер өлөш сығыр, тейер тип көтөү. **Өмөт тотоу** нимәгәлер өмөтләнеү, өмөттө өҙмәй йәшәү.

♦ **Күҙендә** (*йәки* **йөҙөндә**) **өмөт юҡ** бөтә этлек, яуызлыҡты булдырырҙай кешегә ҡарата әйтелә. *„Китсәле, булмаҫ! Нисек кеше үлтермәк кәрәк!" „Булыр ул малайҙан, күҙендә өмөт әҫәре юк уның".* И. Насыри.

● *Өлөшө барҙың өмөтө бар.* Мәҡәл. *Һурпа теймәҫ ерҙән калья өмөт итмә.* Мәҡәл.

**ӨМӨТДАР** *с.* Өмөт менән йәшәгән; өмөтлө. *Өмөтдар булыу.*

# Ө

**ӨМӨТЛӨ** *с.* **1.** Өмөт (1 мәғ.) менән һуғарылған. *Өмөтлө хыял. // Хатын бик өмөтлө яҙа.* ■ *Ахыр һөнәрсе Өйрәнсекkә тағы өмөтлө караш ташлаған: — Бәлки, өйрәнеп карарһың?* З. Биишева. / Ниҙер вәғәҙә иткән. *Өмөтлө йыл.* ■ *Ул болоттар һөтлө кукрәк төҫлө, ул болоттар шундай өмөтлө.* М. Кәрим.

**2.** Алдағы көндә ниндәйҙер яҡшы эш, һөҙөмтә көтөрлөк; өмөт бәйләрлек. *Өмөтлө уҡыусы.* ■ *Улар иң өмөтлө студенттарҙан иҫәпләнә ине. Ғирфан был өмөттө аҡланы ла инде — аспирантураны тамамлап, диссертация яҡланы.* З. Биишева. / Өмөт тыуҙырған, ышаныслы. *[Рәхимә] Имайҙың өмөтлө һүҙҙәренә ҡыуанып, .. аҡҡы өйгә төшөп китте.* Һ. Дәүләтшина.

**ӨМӨТЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Ышандырып көттөрөү, өмөт биреү. *Квартира булыр тип өмөтләндерәләр.*

**ӨМӨТЛӘНЕҮ** *к.* Ниҙеңдер булырына ышаныу; өмөт бәйләү. *Үткән ғүмерҙәр тик төш кеүек. Тынысланһы, иркәм, өмөтләнмә, талпынмаһын күңелең ҡош кеүек.* Б. Мирзанов. *[Ауырыу — иптәшенә:] һине йәшәртеп булмай .. инде год уҙған, артыҡ ҡартайғанһың, өмөтләнмә юҡҡа.* С. Агиш.

**ӨМӨТҺӨҘ** *с.* **1.** Өмөтө (1 мәғ.) ҡалмаған, өмөтө юҡ. *Өмөтһөҙ ҡараш. // Өмөтһөҙ йәшәү.* ■ *Йондоҙом өмөтһөҙ, күҙ илай өҙлөкһөҙ, каҙалһын донъяһы, күңелгә ҡыҙыкһыҙ!* Ш. Бабич.

**2.** Һис бер яҡшылыҡҡа өмөт (2 мәғ.) бирмәгән, ышанысһыҙ. *Өмөтһөҙ эш.* ■ *Өмөтһөҙ кеше түгел ине лә баһа Юламан! Ҡартлыҡтыр инде.* З. Биишева.

**ӨМӨТҺӨҘЛӨК** *и.* Өмөтһөҙ (1 мәғ.), төшөнкө хәл. *Йә була, йә юҡ тип өмөтһөҙлөктә йөҙгән, яна-көйөнә йөрөгән егеттәр ҙә юҡ түгел.* Т. Хәйбуллин. *Бәхетлемен .. өмөтһөҙлөк менән һағыш баҫҡан күңелдәрҙә дәрттәр уятһам.* Ш. Әхмәтов. **Өмөтһөҙлөккә төшөү** (*йәки* **бирелеү**) бөтә өмөттө юғалтып, тормоштан һүрелеү *[Тәнзилә — Сәгиҙәгә:] Сабыр ит, балаҡай, илау бер ҙә файҙа итмәҫ, үҙеңде бөтөрмә, үтә ҡайғырып, өмөтһөҙлөккә төшмә.* М. Тажи. *Халыҡ тамам өмөтһөҙлөккә бирелде.* З. Биишева.

**ӨМӨТҺӨҘЛӘНЕҮ** *к.* Ниҙеңдер булырына ышанмау, өмөттө (1 *мәғ.*) юғалтыу. *Беҙ кәмә даулап ҡысҡырып, бик оҙаҡ торабыҙ. Бер аҙҙан өмөтһөҙләнеп, ҡул һелтәп, тынып ҡалабыҙ.* Ә. Вахитов.

**ӨМӨТҺӨНӨҮ** *к. кар.* **өмөтләнеү.**

**ӨМӘ** *и.* **1.** Кемгәлер ярҙам ниәтенән һый хаҡына йәки бөтөнләй буш күмәкләп башҡарылған эш. *Бесән өмәһе. Тиҙәк һуғыу өмәһе. Өмә сәйе.* ■ *Улар бөтәһе лә бөгөн Аҡназаровка өй күтәрешергә өмәгә килгән.* Ә. Вәли. **Ҡаҙ өмәһе** *этн.* көҙ көнө күпләп ҡаҙ һуйғанда үткәрелгән уйын-көлкөлө дөйөм байрам төҫөн алған өмә. *Шаулап ҡаҙ өмәләре үтте, ҡыҙҙар йырлай-йырлай ҡанат осорҙо, улар ауыл өҫтөнә күтәрелде, ҡайҙа барып төшөүе түҙемһеҙлек менән көтөлдө.* Р. Низамов. **Өмә балсығы** өмә менән өйҙө һылап бөткәс, ашына саҡырыу өсөн хөрмәтле, оло бер кешегә ебәрелә торған бер йомарлам балсыҡ [саҡырылған кеше шул балсыҡ урынына бер йомғаҡ май тотоп килергә тейеш]. *[Мәғфүрә:] Анау көндө Муйылбикәлә балсыҡ өмәһендә булғайным. Шунда беҙ өмә балсығы ебәреп, Урал әбейен саҡырттыҡ, .. төн уртаһына тиклем һөйләшеп ултырҙыҡ.* Һ. Дәүләтшина. / Дөйөм файҙаға ял көндәре ойошторолған күмәк эш. *[Барый:] Бесәнгә төштөк әле, иртәгә колхоз өмәһенә барырға йыйынабыҙ.* С. Кулибай.

**2.** Һый хаҡына аҡса йәки башҡа нәмә йыйыу йолаһы. *Аҡса (йәки ҡалта) өмәһе.* **Өмә аҡсаһы** ошо йола буйынса йыйған аҡса.

□ **Өмә итеү** өмә (1 мәғ.) яһау; эштә ярҙам итешергә кеше йыйыу.

● *Борай буткаһы ҡаҙ өмәһендә тәмле.* Мәҡәл. *Энә эшенә өмә кәрәкмәй.* Мәҡәл.

**ӨМӘЛӘҮ** *к.* Өмә яһау, өмә үткәреү. *Беҙҙең яҡта өмә яһау йолаһы бар. Берәү өмәләп, өйөн күтәртеп ала, берәү йорт-ҡаралдыһын төҙәттереп ҡуя. Бер ҡараһаң, тиҙ ҙә, уңай ҙа, кешеләре лә табыла.* С. Кулибай.

**ӨМӘЛӘШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **өмәләү.** *Шулай итеп бергә, өмәләшеп эшләп ҡуйырҙар.* Ғ. Амантай.

**ӨМӘСЕ** *и.* Өмәлә ҡатнашҡан кеше. *Ҡарамдың әсәһен өмәселәргә аш бешерергә ҡуйғандар.* Н. Мусин. *Хәким, байҙың ҡушыуы буйынса, өмәселәрҙе һыйлау өсөн һимеҙ тыу бейәне һуйҙы.* Я. Хамматов.

**ӨН** [1] *и.* **1.** Боғаздан, тамаҡтан сыҡҡан тауыш. *Әтәскәйем, кемде уятаһың, күккә һуҙып моңло өндәрең?* Д. Юлтый. *Ниндәйҙер тантаналы тынлыҡ бында. Бер өн сыкмай.* Я. Вәлиев. *Алпамышаның көнө юҡ, ҡурайының өнө юҡ.* „Алпамыша“.

**2.** Һүҙ менән бергә сыҡҡан тауыш. *Мин һағындым тыуған өндәрҙе, әсәйемдең иркә тауышын.* Н. Нәжми. **Өн быуылыу** (*йәки* **быулығыу**) тын алыу ҡыйынлашыу, тын ҡыҫылыу. *[Мин] йыуатырға тырышам .. үҙемдең өнөм быуыла, йөрәгем дарһылдап тибә.* С. Кулибай. **Өнөн тығыу** 1) һүҙ әйтә алмаҫлыҡ итеү; 2) юҡ итеү, дөмөктөрөү. **Өнө тығылыу 1)** һүҙ әйтә алмаҫ булыу; 2) юҡ булыу, дөмөгөү. *Ил баҫыусы вәхшиҙәрҙең өнө тығылды инде. Фашистар донъя йөҙөнән мәңге һөрөлдө инде.* Ф. Дәүләтшин. / Әйтелгән һүҙ. *Туҡта, тик тор, әй, тәкәббер бай! Тыңла халҡың өнөн.* М. Ғафури. *Батырмын, тип кем әйтмәй — яу килгәндә йүне юҡ, сәсәнмен, тип кем әйтмәй — дау килгәндә өнө юҡ.* Салауат Юлаев.

**3.** Әйтелгән һүҙҙең айырым бер мәғәнәгә эйә булған иң ваҡ киҫәге. *Аңҡау өндәре. Тартынҡы өн.* ■ *Хәйруллин һәр бер „р“ өнөн асыҡ сығарып, аңлатып бирҙе.* С. Агиш.

◆ **Өнөң тығылғыр** ҡарғағанда әйтелә. **Өнһөҙ булыу** һүҙһеҙ ҡалыу.

**ӨН** [2] *и.* Йоҡламаған ваҡыттағы хәл; уяу, ысын хәл; *киреһе* төш. *Ишетелә ҡолдарҙың зар йыры, йәш түгә һылыуҙар зинданда. Яҡты көн, татлы өн юҡ унда, зың да зың бығауҙар сылбыры.* М. Кәрим. **Өнмө [был], төшмө** *йәки* **эллә өн, эллә төш** бер нәмәгә аптырап, ышанмай торғанда әйтелә. *Аптырайҙар: төшмө был, тип, өнмө, ҡалтырайҙар: нимә был тип, енме?* Ш. Бабич. *„Атаҡ-атаҡ, өнөңмө, төшөңмө был атаһы? Ҡуянды нисек йүгерешеп уҙмаҡ кәрәк, тип ап-*

*тырап калды, ти инә терпе* (Әкиәттән). *Әллә төшөм инде, әллә өнөм, тиңдәшкәйем менән уяндым* (Халыҡ йырынан).

**ӨН** [3] *и. диал. ҡар.* **өң** 1. *Көйгәнәк кош ай мактанһа, өндән сыскан алдым, тиер* (Халыҡ йырынан).

**ӨНДӘМӘ** *и.* Халыҡҡа телдән йәки яҙма рәүештә еткерелгән саҡырыу һүҙе. *Батырша халыкты яуга күтәрергә сакырып, үҙенең атаклы өндәмәһен яҙа һәм Башкортостандың һәр тарафына сапкындар тарата.* Ғ. Хөсәйенов. *Шартламаҫ атом бомбаһы, култамга уны тыя. Изге өңдәмә донъяны бөгөн бер сафка йыя!* Ш. Бикҡол.

**ӨНДӘҮ** *к.* **1.** Нимәгәлер өгөтләү, саҡырыу. *Мин уны [кыҙҙы] каютага инеп, һөйләшеп ултырырга өндәнем.* Ғ. Хәйри. *Кескәйҙәрҙе тышка өндәп, март кояшы йылмая.* Ф. Рәхимғолова. / Аңлатып, төшөндөрөп, күндерергә, ризалаштырырға тырышыу. *Эшкә өндәү.* ■ *[Кәштәндәр] ер һатырга халыкты өндәй башланы.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Нимәгәлер саҡырып, халыҡҡа мөрәжәғәт итеү. *Көрәшкә өндәү.* || *Өндәү һүҙе.* ■ *Донъя күргән, заманына күрә укымышлы гына булган старшина [Кинйә Арсланов] ялган батша исеменән яҙылган указдарҙың башкортсаһын үҙе төҙөй, үҙ исеменән дә өндәүҙәр яҙа.* Б. Бикбай. *Илдең зарын һөйләр ул, дауга сакырып өндәр ул [сәсән]* (Ҡобайырҙан). **Өндәү ҡағыҙы** халыҡҡа яҙма мөрәжәғәт.

**3.** *диал. ҡар.* өндәшеү 1. *Өндәмәй генә үтеп китте.*

◆ **Өндәү билдәһе** көслө интонация менән әйтелгән һүҙ йәки һөйләмдәрҙән һуң ҡуйыла торған тыныш билдәһе. **Өндәү һөйләме** саҡырыуҙы, үтенеү-бойороуҙы һәм көслө тойғоно белдергән һөйләм.

**ӨНДӘШ: өндәш** һөйләм өндәшеүҙе, төрлө көслө тойғоно (ғорурланыу, һоҡланыу, нәфрәтләнеү, үкенеү, борсолоу һ. б.) белдергән һөйләм; **өндәш һүҙ** уй-фекерҙең кемгә йәки нимәгәлер төбәлгәнен белдергән, һөйләмгә [телмәргә] грамматик бәйләнеше булмаған һүҙ (мәҫәлән, „әйҙә, егеттәр, ҡуҙғалайыҡ",— тигәндәге „егеттәр" һүҙе).

**ӨНДӘШЕҮ** *к.* **1.** Кемгәлер башлап ауыҙ асып һүҙ әйтеү; һүҙ ҡушыу, һүҙ ҡатыу. *Бер һүҙ өндәшмәй тороу. Өндәшмәй ултырыу.* ■ *Наилә минән бер ауыҙ булһа ла һүҙ көтә. Мин өндәшмәйем.* С. Агиш. *[Һыуһылыу әбей:] „Балам!" — тип кыскырып ебәрҙе, башка һүҙ өндәшә алманы.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Кешегә мөрәжәғәт итеү. *Бөтә кеше уга Заһиҙулла, тип кенә өндәшә ине.* С. Агиш. / Кемделер саҡырып йәки ҡайҙалығынды белдереп, тауыш биреү. *[Сергеев] күренмәй. Әкрен генә өндәшәм, ул яуап бирмәй.* Д. Юлтый.

**3.** Яуап итеп ыңғай йәки кире һүҙ әйтеү. *Өндәшмәй калыу.* ■ *— Ни булды? Ниңә илайһың? .. Катын өндәшмәй.* Д. Юлтый. *Әйтеүемә тагы әйләнеп караны туташым. Үҙе өндәшмәй — тамам каңгырҙы башым.* Ш. Бабич. *Егет башта кыҙҙың һорауҙарына каршы өндәшмәй ултырган* (Әкиәттән).

**4.** Берәй нәмә тураһында һүҙ ҡуҙғатыу; мәсьәлә күтәреү. *Айбулат та быга тиклем даулашып йөрөгән бер душ ере тураһында өндәшә алмаҫ.* Һ. Дәүләтшина.

**5.** *диал. ҡар.* **саҡырыу** 1. *Кунакка өндәшеү. Сәйгә өндәшеү.*

● *Өндәшмәгән өйҙәй бәләнән котолган.* Мәҡәл.

**ӨНДӘШМӘҪ** *с.* Әҙ һөйләүсән; һүҙһеҙ. *Өндәшмәҫ кеше.*

**ӨНӨР** *и. иҫк.* **1.** Берәй эш, хәл, ваҡиғанан ҡалған иҫтәлек, яҡшы хәтирә. *Был бәхет һатып алһаң да табыла торган нәмә түгел, карт булһам да, ошо Уралкайыбыҙҙың өнөрө өсөн бер йырлап ебәрәйем.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Иҫтәлекле бүләк; ҡомартҡы.

**ӨНӨРӨ** *и. диал. ҡар.* **көрпә** [1] 1.

**ӨН-ТЫН** *и.* **1.** Берәй төрлө тауыш, тын алыш һ. б. *Өнө-тыны сыкмай. Өнө-тыны юк.* ■ *Байгубәктән өн-тын булмаган.* М. Буранғолов. / Ҡолаҡҡа ишетелгән төрлө тауыш. *Өй эсе тып-тын, өн-тын юк.*

**2.** *кусм.* Кешенең уйы, ниәте; тын алышы. *Өнөн-тынын белмәйенсә кешегә әллә ни һөйләп булмай.*

**ӨНТӘЙ** *и. диал. ҡар.* **ашыҡ** [1]. *Өнтәй һугыу.*

**ӨНТӘҮ** *к. диал.* Кәметеү. *Йылганың балыгын өнтәп бөттөләр.*

**ӨНҺӨҘ** *с.* Өн, тауыш сығармаған, шаушыуһыҙ. *Өнһөҙ булыу. Өнһөҙ тәбигәт.* // *Өнһөҙ йәйрәп ята дала.* ■ *Кая таштар өнһөҙ ята ла бит, э кешеләр кая таш түгел.* С. Ғәбиҙуллин.

**2.** Кеше менән ҡаршылашмаусан; тыңлаулы. *Хатта йәнһеҙ каялар ҙа өнһөҙ илай йонсоу көндө.* М. Кәрим.

● *Ут менән һыу — өнһөҙ яу.* Әйтем.

**ӨНҺӨҘЛӨК** *м.* Өнһөҙ хәл. *Тәбигәттәге өнһөҙлөк.*

**ОНҺӨҘ-ТЫНҺЫҘ** *с.* **1.** Һис бер тауыш сығармаған; тын. *Өнһөҙ-тынһыҙ дала. Өнһөҙ-тынһыҙ юл.*

**2.** Өнө, тыны сыҡмаған; өнһөҙ-һүҙһеҙ. *Өнһөҙ-тынһыҙ кеше.* // *Өнһөҙ-тынһыҙ йәшәү.* ■ *Кайным аптырап, улына өнһөҙ-тынһыҙ карап торҙо ла ... өндәшмәй генә сыкты ла китте.* Һ. Дәүләтшина.

**ӨНҺӨҘ-ҺҮҘҺЕҘ** *с.* Ауыҙынан һүҙ сығарып әйтмәй торған, тауышы-тыны сыҡмаған; шым, өндәшмәҫ, өнһөҙ-тынһыҙ. *Өнһөҙ-һүҙһеҙ кеше.* // *Өнһөҙ-һүҙһеҙ тыңлау.* ■ *Һай, Зөлхизә, Зөлхизә.. Өнһөҙ-һүҙһеҙ генә аңлай алһаң ине һин картатайыңдың күңелен.* З. Биишева.

**ӨНӘМЛЕ** *с.* Күңел тартырлыҡ, яғымлы. *Өнәмле кеше.*

● *Һөйгән йәрҙең өнө өнәмле.* Әйтем.

**ӨНӘР** *и. диал.* Һөнәр.

**ӨНӘТЕҮ** *к.* **1.** Күңел тартырлыҡ итеү.

**2.** Хуп күрһәтеү, хуплатыу. *Кәңәшемде өнәтерлек яйын таба алмайым.* Ғ. Ғүмәр.

**ӨНӘҮ** *к.* **1.** Күңелгә оҡшатыу; яҡын күреү, яратыу. *Батыр эсәһенең „һайыҫкан" кушаматы күтәргән телдәр һеңлеһен куп һөйләгәне өсөн электән өнәп бөтмәй ине.* И. Ғиззәтуллин. *— Һин дә инде, атаһы, баҫкан ерендә ут сыгарып торган егетте лә өнәмәһәң, гөнаһ булыр.* В. Ис-

хаков. / Иҫәпкә, иғтибарға алыу, үҙ итеү; тыңлау. *Ҡайһы бер балалар, күрәһең, атаәсәһен өнәмәгән кеүек, тыуған ауылын да, тыуған төйәген дә яратмай торғандыр.* Ә. Әһлиуллин.

**2.** Хуп күреү, хуплау. *Зәкиәнең .. атаһы менән әсәһе ҡыҙҙарының артистка, „кеше көлдөрөүсе“ булып китеүен өнәмәй ине.* М. Садыҡова. / Ҡәнәғәт, риза булыу; килешеү. *Ә үгәй инәй беҙгә бик өнәмәне. Уның йылмайыуы ниндәйҙер һыуыҡ, ҡыуандырмай торған боҙло бер йылмайыу ине.* Ғ. Ишбулатов.

**ӨҢ** *и.* **1.** Соҡоп яһалған оя. *Бүре өңө. Йомран өңө. Йылан өңө.* ■ *Ирләндәр йәшәй өңдә, игенде ташый шунда.* З. Биишева. *Был ҡыуыш тигәнең айыу өңө икән. Өңгә инеү менән айыу әбейҙе ҡосаҡлап алған, ашаткан-эсергән, ҡайтармаған* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Яуыз, хаин кешеләрҙең тупланған төйәге, төп йәшәгән урыны. *Дошман өңө.*

♦ **Убыр өңөндәй** самаһыҙ ҙур, күләмле; төпһөҙ. *[Батырйән — Килдебайға:] Эш һөймәйһең, елкәң соҡор, ә нәпсе тигәнең убыр өңөндәй. Һиңә һаман аҙ.* Ә. Мирзаһитов.

**ӨҢҒӨР** *и. диал.* Соҡалта.

**ӨҢҒӨР-СӨҢҒӨР** *с. диал.* Оңғор-соңғор.

**ӨҢГӨС** *и.* Ағастан соҡоп, ҡашыҡ-аяҡ яһай торған ҡорал.

**ӨҢКӨЛДӘҮ** *к.* Өңк-өңк иткән тауыш сығарыу; өңк-өңк итеү. *Эстәрәк, һаҙлыкта, өңшәүер өңкөлдәй.* Т. Килмәхәмәтов.

**ӨҢКӨЛДӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **өңкөлдәү.**

**ӨҢК-ӨҢК** *окш.* Ҡайһы бер ҡош, йәнлек (мәҫәлән, мөншөгөр) ҡысҡырған тауышты белдергән һүҙ. *Өңк-өңк итеү. Өңк-өңк килеү.*

**ӨҢКӘ** *с. диал.* Башҡа, бүтән.

**ӨҢӨЛДӨРӨК** *и. диал.* Күмелдерек.

**ӨҢӨЛӨҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **өңөү.** *Өңөлгән кар.* ■ *Тик һерәйеп ҡалды аҡ мөрйәләр, сығыр өсөн юлдар өңөлдө.* Д. Юлтый. *Әхтәрйән бесән өңөлгән ергә ултырҙы.* Р. Низамов.

**2.** Тишек йәки соҡор булып эскә батыу. *Һуңғы көндәрҙә күҙҙәре төпкә батып, урттары өңөлөп, ябыға төшөүен [Тимер] үҙе үк тоя башланы.* Б. Бикбай.

**3.** *күсм.* Нимәлер өмөт итеү, теләү; тилмереү. *Өңөлөп ҡарау.* ■ *[Сәрби инәй:] Минең бәбекәйҙәрем .. нисек кенә өңөлөп көтһәм дә ҡайтманылар бит.* Д. Буләков.

**ӨҢӨЛӨШӨҮ** *к. урт. кар.* **өңөлөү** 2, 3.

**ӨҢӨР** [1] *и. диал.* Мәмерйә. *Тау өңөрө.*

**ӨҢӨР** [2] *и. диал. кар.* **ҡоһор** 2. *[Ташбулат:] Бөтә нәҫел-нәсәбе тамға ла һала белмәгәндең өңөрөн ҡайтара [Фәүзиә]. Ул редактор, хәбәрсе, шиғыр яҙа.* С. Агиш.

**ӨҢӨҮ** *к.* **1.** Соҡорайтып ҡаҙыу, уйыу, тишеү; соҡор яһау. *Кәбәнде өңөү. Өңөп инеү.* ■ *Аяҡ аҫты бысраҡ, тайғаҡ. Мин тайып йығылып, тәгәрмәс өңгән ергә йығылған баткаҡка тәкмәсеп, барып яттым.* Ж. Кейекбаев. *Текә ярын өңөп Агиҙелдең, оя яһай ҡара ҡарлуғас.* Ҡ. Даян.

**2.** Йыуып ашау, тупраҡты ишелтеү (һыуға ҡарата). *Агиҙел ярҙы өңгән. Яҙғы һыу ерҙе өңөп, йырын яһаған.*

**ӨҢӨШ** *и.* Ер аҫтында, шахтала ҡаҙған юл. / Тау тишеге, ҡыуышлыҡ.

**ӨҢРӨЙ** *с.* Өңрәйеп торған. *Өңрөй ауыҙ.*

**ӨҢРӘЙЕҮ** *к.* **1.** Тар, тәрән булып соҡорланыу, өң ауыҙына оҡшау. *Өңрәйеп торған мәмерйә ауыҙы. Өңрәйеп торған тишек.* ■ *Фәтхи һалдат ҡайтканда, .. бәләкәс кирбес өйҙөң тәҙрә урындары ғына йәмһеҙ булып өңрәйеп тора ине.* С. Агиш. *Ерҙә тора әле өңрәйеп уйған соҡорҙар.* Ғ. Ғүмәр. *Батырҙар ҡарттың юҡ булған ерендә өңрәйеп торған тәрән бер тишек күргән* (Әкиәттән).

**2.** Төпкә төшөп, уйылып, соҡрайыу. *Аҙна-ун көн буйына Салиха тамағына ашаманы, ябыҡты, күҙҙәре өңрәйеп, эскә батты.* Ж. Кейекбаев. **Өңрәйеп ҡарау** нык теклэп, тилмереп ҡарау. *Өңрәйеп ҡарап ултырыу.*

**ӨҢРӘЙЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **өңрәйеү.** *Өңрәйешеп күренеү.* ■ *Ҡарындыҡтары йыртылған тәҙрәләр, һытылып аҡҡан күҙ һымаҡ, өңрәйешеп тора.* Ф. Иҫәнғолов.

**ӨҢРӘЙТЕҮ** *к.* Тар, тәрән итеп соҡорлау, өң ауыҙына оҡшатыу. *Өңрәйтеп ҡуйыу.*

**ӨҢШӘЙЕҮ** *к.* **1.** Ныҡ өмөт итеү, теләү, тилмереү; өңөлөү. *Кеше ашағанды өңшәйеп ҡарап ултырыу.*

**2.** *диал.* Өңрәйеү. *Өңшәйеп тороу. Мәмерйәнең ауыҙы ҡырҙан уҡ өңшәйеп күренеп тора.* ■ *Элек бында [балсыҡ сыҡҡан ерҙә] күрше ауыл сыуашы Архип кирбес һуға торғайны. Ана бит ҡаҙылған соҡор-саҡырҙары әле лә өңшәйеп тора.* Ә. Вахитов.

**ӨҢШӘЙЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **өңшәйеү** 1. *Йәтим ҡалған балаларҙай, ағастар, өңшәйешеп, бөршәйешеп, балауыҙ һыға.* С. Ғәбиҙуллин.

**ӨҢШӘЙТЕҮ** *к.* **1.** Ныҡ өмөтләндереү; тилмертеү.

**2.** *диал.* Өңрәйтеү.

**ӨҢШӘҮЕР** *и. диал.* Мөншөгөр. *Ҡапыл һаҙлыкта өңшәүер өңкөлдәне.* Ғ. Ибраһимов.

**ӨПЛӘҮ** *к.* Тотош һыпырып урлау. *Өйҙө өпләп сыҡтылар.*

**ӨПСӨ** *и.* Ҡойошҡанға беркетеп ҡуйылған көмөш көмбәҙ.

**ӨПСӨН** *и.* **1.** Ғәскәри кәрәк-яраҡ.

**2.** Матурлап, биҙәп эшләнгән ат ябыуы. *Аҡ ял да ғына саптар ай атымды өпсөндәре юҡ тип уҡ һатмағыҙ* (Халыҡ йырынан).

**ӨПӘЙ** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**ӨПӘК** *и.* Ат муйынының ҡамыт һуғып шешкән ере. *Уңелдерек һуғып, өпәк булһа, таҙға барыр аттың эйәһе* (Халыҡ йырынан). **Өпәк төкөтөү** өпәк тиҙ ҡутырлап түгелеп төҙәлһен өсөн таҙ кешенең башын ярағa төкөтөп ырымлау.

**ӨПӘНЛӘҮ** *к. диал.* Сейәлеү (йылҡының ялҡойроғона ҡарата). *Аттың ялы өпәнләп бөткән, тарарға кәрәк.*

**ӨРГӨҘӨҮ** *к. диал. кар.* **өрҙөрөү** [2]. *Йөрөнө „Әлислах“ Вафаһы барҙы юктан торғоҙоп, ниндәйҙер дарман менән каруан күсеп, эт өргөҙөп!* Ш. Бабич.

**ӨРГӨЛӘҮ** [1] *к.* Һирәк-һирәк өрөү (тынға, елгә ҡарата). *Ҡулдарға өргөләп алыу.* ■ *Көҙгө көндөң арыу уҡ һалҡын елдәр өргөләй торған миҙгеле етте.* Һ. Дәүләтшина.

**ӨРГӨЛӘҮ** [2] *к.* Һирәк-һаяҡ өрөү (эткә ҡарата).

*Ҡайһы бер ихаталарҙа ғына эттәр өргөләп ҡуя.* Ф. Мансуров. *Саптым артынан ҡуяндың „вау ҙа вау“ тип өргөләп.* Ш. Бабич.

**ӨРГӨС** *и. диал.* **1.** Төтәткес. *Өргөс менән умарта ҡарау.*

**2.** *ҡар.* **күрек** 1.

**ӨРГӘҮ** *ҡ. диал. ҡар.* **үрсеү** 1.

**ӨРҘӨЙ** *с.* Хәленән килмәҫ ерҙә лә эшкә ынтылып тороусан. *Өрҙөй кеше.*

**ӨРҘӨРГӨС** *и.* **1.** Өрөп, тын тултыра торған ҡорал. *Велосипед өрҙөргөсө.*

**2.** *диал.* Елгәргес. // *Өрҙөргөс машина.* ■ *Өрҙөргөс тә, көйләп шатлыҡ йырлап, буранлатып, кәбәк осора.* Ғ. Мәсғүт.

**3.** *диал. ҡар.* **күрек** 1. *Тимерлек өрҙөргөсө.*

**ӨРҘӨРӨЛӨҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **өрҙөрөү** [1].

**ӨРҘӨРӨҮ** [1] *ҡ.* **1.** *йөкм. ҡар.* **өрөү** [1] 2—4. *Борғо өрҙөрөү. Өрҙөрөп осортоу. Өрҙөрөп тултыртыу. Өрҙөрөп һүндертеү.*

**2.** Күрек йәки башҡа нәмә ярҙамында һауа ебәреү, һауа ағымы йүнәлтеү. *Сәхипьямал итек ҡунысы менән самауырҙы өрҙөрә, итек уның ҡулында гармун күреге кеүек йөрөй.* Х. Ғиләжев.

**3.** *кусм.* Күңелдә ниндәйҙер хис-тойғо тыуҙырыу, уятыу. *[Гармунда] һыҙып киткән моңдар, тынлыҡ ярып, йөрәктәргә дәрттәр өрҙөрә.* Ғ. Мәсғүт.

**ӨРҘӨРӨҮ** [2] *ҡ.* Өрөргә юл ҡуйыу; абалатыу. *Эт өрҙөрөү.* ■ *Өләсәһе шишмәнән һыу ташый әле артҡа, алға бөгөлөп. Фәстәхәтдин урам сарлап, йөрөй эт өрҙөрөп, әҙәм көлдөрөп.* Т. Арслан.

**ӨРҘӨРТӨҮ** *ҡ.* Күрек йәки башҡа нәмә ярҙамында һауа ебәртеү. *Михаил Фролов күк төтөн эсендә күреген өрҙөртөп, ут сәсрәтеп, ниндәйҙер бер ҡалын тимерҙе ҡыҙҙыра ине.* Һ. Дәүләтшина.

**ӨРКӨНӨС** *с. диал. ҡар.* **ҡурҡыныс** 1.

**ӨРКӨНӨҮ** *ҡ.* Үҙлегеңдән үҙең ҡурҡыу. *Һаман төн .. Барам, төн тип өркөнмәйем.* Б. Мирзанов.

**ӨРКӨТӨҮ** *ҡ.* **1.** Ҡурҡытып ҡасырыу (ҡош-ҡортто). *Тау-таштарҙы тетрәтеп, ҡош-ҡорттарҙы өркөтөп, .. Шүлгән күле төбөнән Һәүбән донъяға сыҡҡан.* «Аҡбуҙат».

**2.** *кусм.* Ҡурҡыуға төшөрөү (кешене); ҡурҡытыу. *Иң яманы шул — мулланан бөтә әҙәм ҡурҡа. Шулай кеше өркөтәп йәшә, имеш, албаҫты шикелле.* М. Кәрим. *Ҡаты бәрелеп, ғәүам халҡын өркөткәнсе, һылап-һыйпап барын бергә бәйләү яҡшы.* Ш. Бабич.

◆ **Ҡабыҡ һуғып, бесәй өркөтөү** юҡтан ығы-зығы ҡуптарыу.

● *Күренмәҫ түңгәк ат өркөтөр.* Мәҡәл.

**ӨРКӨҮ** *ҡ.* **1.** Ҡапыл ҡурҡып ҡасыу (йәнлек, хайуанға ҡарата). *Ухылдап килгән паровоздан өркөп, һарыҡтар ... юл аша сабып сыға башланы.* Б. Бикбай. *Юлындағы һәр бер ҡараскынан өркһә, өркһөн әйҙә ҡырҡмыш тай.* Р. Бикбаев.

**2.** *кусм.* Ҡурҡыуға төшөү (кешегә ҡарата); ҡурҡыу. *Түмән кенәздәре .. бөйөк Себер ханына яһаҡ түләй, уның ҡылысынан өркөп баш эйә.* Ш. Шәһәр. *Батыр егеттең йөрәге ҡоро ҡапҡантан өркмәҫ.* «Аҡбуҙат». **Бүренән өркҡән һарыҡ көтөүе** кеүек ҡурҡып ҡасҡан күмәк халыҡҡа ҡарата әйтелә. *[Аҡтар] бүренән өркҡән һарыҡ көтөүе кеүек, ашығып сигенә.* М. Ғафури. **Күләгәнән өркөү** ҡурҡмаҫ нәмәнән ҡурҡыу. *Сын көрәшсе юғалтмаҫ үҙ һуҡмағын, күләгәнән өркөп йығылмаҫ.* Ғ. Хәйри.

● *Ат кәбәндән өркмәй.* Мәҡәл. *Көслөнән ҡурҡма, үсленән өркмә.* Әйтем.

**ӨРКӨШӨҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **өркөү** 1. *Малдар өркөшөп, сабып сығып китте.*

**ӨРКӘ** *и.* Башаҡлылар ғаиләһенә ҡараған, аҡ мысайҙыҡлы һымаҡ йомшаҡ, йомро башаҡлы, ҡаяҡ япраҡлы бер йыллыҡ һәм күп йыллыҡ үлән. *Хуш еҫле өркә.*

**ӨРКӘК** *с.* **1.** Юҡтан ғына өркөп, тертләп барыусан. *Өркәк ат.*

**2.** *кусм.* Ҡурҡаҡ. *Өркәк йән.* ■ *Өркәк булмаҫ ир-батыр. Ир-егеттең эсендә әйәрле, йүгәнле ат ятыр* (Ҡобайырҙан).

**ӨРКӘКЛЕК** *и.* Өркәк булыу сифаты.

**ӨРКӘКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Өркәккә (2 мәғ.), ҡурҡаҡҡа әйләнеү; өркәк, ҡурҡаҡ булыу. *Ир-егеттәр нимә үйлайҙар һуң, өркәкләнеп ниңә шымдылар?* М. Тажи.

**ӨРКӘТ** *с. диал.* Өркәк. *Өркәт ат.*

**ӨРКӘТӘҮ** *и.* Солоҡҡа ҡуйыр өсөн балауыҙ мендерә торған һауыт.

**ӨРЛӨК** *и.* Иҙән йәки түбә таҡтаһы һалына торған арҡыры бүрәнә. *Иҙән өрлөгө. Түбә өрлөгө.* ■ *Хаммат өрлөккә эленгән бишле лампаға ут ҡабыҙҙы.* З. Биишева. *Ҡолмәт өрлөктәге ике сөй араһына ҡыҫтырып ҡуйған ҡурайын алып, бер нәмә өндәшмәй, уйнай башлай.* С. Агиш. / Һарай, келәттең асамай ултыртылған арҡыры ағасы. *Келәт өрлөгө. Һарай өрлөгө.* ■ *Ғатаулла ҡарт .. балтаһынан ҡап-ҡоп иткән тауыш сығарып, өрлөк өҫтөндә асамай ояһы соҡоп ултыра.* Й. Солтанов. *Икенсе көндө Ҡамыр батыр .. ығын епкә бәйләп, келәт өрлөгөнә аҫҡан* (Әкиәттән).

◆ **Өрлөккә сабыу** ант итеү. — *Нурислам ҡайнаға бит, икенсе эсмәйем тип, өрлөккә сапҡан, тиҙәр.* Ф. Иҫәнғолов. **Өрлөк һымаҡ** мыҡты кәүҙәгә ҡарата әйтелә. *Өрлөк һымаҡ ир.* **Өрлөк шаршауы** *ҡар.* **шаршау.**

**ӨРЛӨКЛӨК** *и.* Өрлөк өсөн әҙерләнгән ағас. *Урмандан өрлөклөк алып ҡайтыу.* // *Өрлөклөк бүрәнә.*

**ӨРЛӨКСӘ** *и.* Өрлөк шаршауы. *Өрлөксә тартыу.*

**ӨРӨ** *и. диал.* **1.** *ҡар.* **турта** 1. *Аштың өрөһөн шапыр.*

**2.** Һөҙлөк. *Ыҡ һыуында аштағы өрө кеүек, майлы таптар йөҙә.* И. Абдуллин.

**ӨРӨК** *и.* **1.** Гөлсәсәктәр ғаиләһенә ҡараған, һары, итләс емеш бирә торған алһыу сәскәле, муйыл япраҡлы йылы яҡ ағасы. *Өрөк ағасы. Өрөк баҡсаһы.* **Урман өрөгө** муйыл япраҡлы, аҡ сәскәле, ҡара күк емешле, сәнскәкле ҡыуаҡ.

**2.** Шул ағастың емеше. *Киптән өрөк. Өрөк һөйәге.*

**ӨРӨЛДӘЙ** *и.* Сөсө ҡамырҙан өҙөп-өҙөп, майҙа ҡайнатып бешергән аҙыҡ.

**ӨРӨЛМӘЛЕ** *с.* Өрөп тын тултырыла торған. *Өрөлмәле кәмә. Өрөлмәле уйынсыҡ.*

**ӨРӨЛӨ** *с. диал.* Һөҙлөклө. *Өрөлө аш.* ■ *[Малек] туҫтакты өрөлө һурпа менән тултырып, алып керҙе лә миңә һуҙҙы.* С. Ҡудаш.

**ӨРӨЛӨҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **өрөү**[1] 2—5. *Өрөлгән шар.*

**2.** Тын, һауа тулып ҡабарыу. *Ямғыр тамсыһына өрөлөп, һыу өҫтө күбекләнһә, көн йонсоуға килә.* Һынамыш.

**3.** *күсм.* Йомшаҡ ҡына булып ҡабарыу. *Өрөлөп бешкән ҡабартма.* / Тумалаҡланып ҡалҡыу; тумпайыу. *Көслө беләк, киң күкрәк, мыҡты елкәләрҙең мөсәләре һәр береһе үҙенә башҡа өрөлөп тора.* Ғ. Дәүләтшин.

**ӨРӨЛӘНЕҮ** *к. диал.* Һөҙлөкләнеү. *Туҡмас ҡабартылды ҡаҙандарҙа, өрөләнеп һимеҙ ит беште.* Х. Ғиләжев.

**ӨРӨМ** [1] *и. диал.* **1.** һөҙлөк.

**2.** Бишбармаҡ өҫтөнә тураған май.

**ӨРӨМ** [2] *и. диал. кар.* **ырыу** [1] **1. Өрөм ботағы** *диал. кар.* **ара** [2]. *Йәйләүгә сыҡҡан кешеләр үҙҙәре араһындағы иң ҡарт ағаның тирмәһен күтәргәндәр. Ул ярлы булғанлыҡтан, өрөм ботағы уның өсөн ҡырҡ тәкә һуйған, ҡырҡ һаба ҡымыҙ әсеткән.* Ғ. Дәүләтшин.

**ӨРӨНДӨ** *и.* Ел өрөп, өйгән ҡар. *Машина .. өрөндөгә килеп менһә, хәлһеҙләнеп туҡтай.* Ш. Янбаев. *Һепертмә буран урыны-урыны менән өрөндө һалған.* Ғ. Ибраһимов.

**ӨРӨНКӨ** *с. диал.* Ҡабарынҡы. *Өрөнкө болот. Өрөнкө күл. Өрөнкө яңаҡ.* ■ *Яр буйындағы ҡамыш өйкөмдәренең баштарын өрөнкө аҡ томан болото йомшаҡ ҡына иркәләп тарай.* Ф. Иҫәнғолов.

**ӨРӨҮ** [1] *к.* **1.** Билдәле йүнәләштә хәрәкәт итеү (елгә ҡарата); иҫеү. // *Елдең өрөүенә ҡаршы.* ■ *Бер генә ҡатлы, ҡырҡ ҡораулы тәҙрәләр, көслө елдең өрөүенә түҙмәй, көйөҫ-көйөҫ сылтырап китә.* Ғ. Дәүләтшин. *Иртәнге ел әкрен генә өрөп, һыйпап үтә үлән баштарын.* Ғ. Сәләм. / Ярыҡтишектән эскә үтеү (һалҡын һауаға ҡарата). *Тәҙрәнән өрә.* ■ *Ҡырау ҡаплаған бәләкәй генә тәҙрәләрҙең тишегенән шыжлап ел өрә.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Көс менән ауыҙҙан тын сығарыу. *Сәйгә өрөү. Тынды өрөү. Утҡа өрөү. Өрөп һүндереү.* ■ *Әхмәдулла бабай ҡурайына һыу бөркөп, зыңҡылдатып өрөп алды ла, аҡрын ғына уйнап ебәрҙе.* Ә. Вахитов. *Дейеү ажғырып, тыны менән илселәрҙе бер ары, бер бире өрөп йөрөткән* (Әкиәттән). / Тын менән еңел нәмәне осороп, таратып ебәреү йәки шундай нәмәнән таҙартыу. *Өрөп осороу. Өрөп таҙартыу.* ■ *Ҡотлояр тәмәкеһен боролдатып өрә-өрә, мыҫҡыллы көлдө.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Берәй нәмәнең эсенә тын, һауа ебәреү. *Тупты өрөү. Өрөп тултырыу.* ■ *Заводта .. 16—18 сәғәт буйына ҡайнар мейес эргәһендә тиргә батып, быяла өргәндәр.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 21 апрель.

**4.** Музыка ҡоралын тын менән ҡысҡыртыу. *Борғо өрөү.* ■ *Бер ҡараһаң — Исрафил илһам сурын өргән кеүек.* Ш. Бабич.

**5.** *күсм.* Күңелгә ниндәйҙер хис-тойғо һалыу. *Дәрт өрөү. Илһам өрөү. Рух өрөү.* ■ *Шиҡ солғаған йөрәктәргә мин ҡыйыулыҡ өрәмен.* М. Кәрим.

♦ **Йән өрөү** *кар.* **йән. Өрмәгән ергә ултыртмау** ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеү. *Көтөлмәгән бәхеттән иҫергән техник секретарь өрмәгән ергә ултыртмаһы Тимергәлене — бары тик ярарға, ни әйтһә, шуны эшләргә, нимә һораһа, шуны табырға әҙер торҙо.* Я. Вәлиев. **Өрөп ҡабыу** эште бөтә яғын уйлап ҡына эшләү. *[Фәхри:] Крәҫтиәндең хәҙер ауыҙы бешкән шул инде, өрөп ҡаба.* Б. Бикбай. *Аҡназарҙың ҡатыны бер ауыҙы бешкәс, өрөп ҡаба — бәләне үҙе саҡыртып килтермәй хәҙер, килһә инде, уға ҡаршы тора белә* (Әкиәттән).

● *Ауыҙы бешкән өрөп эскән.* Мәҡәл. *Ел өрмәй ҡурай һелкенмәй.* Мәҡәл.

**ӨРӨҮ** [2] *к.* **1.** Өҙөк-өҙөк итеп көслө тауыш биреү (этҡә ҡарата). *Абалап өрөү. Лауылдап өрөү. Ләңкелдәп өрөү. Саңҡылдап өрөү.* ■ *Тәнзилә әбей ҡулындағы һауыты менән этҡә һелтәнде, ә ул уның һайын абалап өрә-өрә, уларҙың артынан бер аҙым да ҡалмай эйәреп килде.* М. Тажи. *Эт, билгеле, өрөп ҡаршылаһы, шығырлаһы ҡапҡа тауышы.* М. Хәй. *Шул саҡ эт өрөүенән туҡтап, ҡойроғон болғап һунарсы янына килә башлай* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Асыу белдереп, тауыш күтәреү, шаулашыу; әрләшеү. *[Ҡолморҙа:] Бикморҙа ҡарт, һиңә ғүмереһ буйына аҡыл инмәне. Ниндәй генә сход булмаһын, бер үҙең өрөп сығаһың.* Т. Хәйбуллин. *Күл янарҙар, бысраҡ ташлар дошмандар, уҫал эттәй арттан өрөрҙәр.* Ғ. Мәсғүт.

**ӨРӨШӨҮ** [1] *к. урт. кар.* **өрөү** [1] 2—5.

**ӨРӨШӨҮ** [2] *к. урт. кар.* **өрөү** [2]. *Эттәр өрөшә башланы.*

**ӨРПӨ** *с. диал.* Өрпәк. *Өрпө ҡар.*

**ӨРПӨК** *и. диал.* Йүргәк.

**ӨРПӨКӘЙ: өрпөкәй тауыҡ** *диал.* супайлы тауыҡ.

**ӨРПӨЛДӘҮ** *к.* Йомшаҡ, көпшәк булыу, осоп тороу (баҫылып ныҡынмаған ҡар, көл һ. б. ҡарата). *Өрпөлдәп торған саң. Өрпөлдәп ятҡан йәш ҡар.*

**ӨРПӨЛСӘК** *и. диал.* Соҡалта.

**ӨРПӘЙЕҮ** *к.* **1.** Йомшаҡ булып, ялбырлап күпереү, ҡабарыу (йөн, мамыҡ кеүек нәмәгә ҡарата). *Ул замандарҙа айыуҙың да, төлкө ҡойроғо һымаҡ, бик оҙон, өрпәйеп, туҡынланып торған һорғолт ҡара ҡойроғо булған, ти* (Әкиәттән). / Тырпайыу. *Йылға соҡоро буйлап иҫкән һалҡын ел .. яңғыҙ ағастың ботаҡ остарында өрпәйеп ҡалған барлы-юҡлы һары япраҡтарын өҙгөләне.* Ғ. Вәлиев. *Тракторист бүркен күтәрә биреп, өрпәйгән сәстәрен рәтләп ҡуйҙы.* Ә. Вәли.

**2.** *күсм.* Ҡабарынып, асыуланып туҙып барыу; өҙрәйеү. *Ат ҡараусы Хәлил уңған егет, ул әйттеме — булдыра. Булмаҫтайға, тиккә өрпәймәй.* Ҡ. Даян.

**3.** *диал.* Өлпәйеү. *Өрпәйеп үҫкән ағас.* ■ *Ҡаяның иң башында өрпәйеп кенә ҡарағайҙар үҫә.* Ж. Кейекбаев.

**ӨРПӘЙТЕҮ** *к.* Туҙғытып ялбыратыу; ҡабартыу (йөн, мамыҡ кеүек нәмәне). *Сәсте өрпәйтеү.* ■ *Бесәй этте күреп, һыртын өрпәйтте.*

М. Тажи. *Йөн өрпәйтеп, йүгереп һыуҙар сәсеп, ак сәпсектәр тамсы эсерҙәр.* Б. Вәлит.

**ӨРПӘК** *с.* Йомшаҡ, осоҡ ҡына булып ҡабарып ятҡан (ҡар йәки башҡа шундай нәмәгә ҡарата). *Өрпәк кар.* ■ *Усактағы торомбаштар яныт бөттө. Өҫтөн өрпәк кук көл каплаған куҙҙар ғына калды.* Ҡ. Даян. *Өрпәк ярма кар ҙур һукмактан уткән йәнлек эҙен шунда ук юя, кумә барған.* С. Кулибай. *Өрпәк-өрпәк карҙар яуа, купереп, калка ак мамык.* А. Игебаев.

**ӨРПӘКЛӘНЕҮ** *к.* Йомшаҡ, осоҡ ҡына булып ҡабарыу; өрпәк булыу. *Өрпәкләнеп яткан кар.* ■ *Өрпәкләнеп яткан эҫе һары ком каплаған такыр дала юлы кисә Емеште кайтыу ягына алып сыгып китте.* З. Биишева.

**ӨРПӘКЛӘҮ** *к.* Өрпәк итеү. *Өрпәкләп кар яуа.*

**ӨРПӘЛӘМ** *с. диал.* Өрпәк. *Өрпәләм карҙа сангы менән юлга сыкһаң, юлыңды бик ырата алмаҫһың.* Н. Мусин.

**ӨРФӨЙӘ**[1] *и.* Боронғо аҡсанан эшләнгән тәңкә төрө. *Өрфөйә тәңкә.*

**ӨРФӨЙӘ**[2] *и.* Йоҡа ғына, үрмәксе ауы һымаҡ ҡына итеп бәйләнгән нәмә. //*Өрфөйә шәл.*

**ӨРӘГӘС** *с.* Күп өрөүсән, өрөүгә әүәҫ (эткә ҡарата). *Йәш һунарсы ауылга кайтып ингәндә халык йоконан тормагайны әле. Уны тик өрәгәс эттәр генә каршы алды.* Ҡ. Даян.

● *Ат аҫылы юртак булыр, өрәгәс эт куркак булыр.* Әйтем.

**ӨРӘЙ**[1] *и.* Эске ҡеүәт; ҡот, рух. *Акмәмбәттең батырлыктары ... казактарҙың өрәйен алып бөткән* (Хикәйәттән). / Шул көс-ҡеүәттең йөҙгә сыҡҡан сағылышы; ҡот. **Өрәй ҡасыу** ҡот осоу, ҡурҡыу.

**ӨРӘЙ**[2] *с. диал.* Ғауғасыл.

**ӨРӘЙЛЕ** *с.* Ныҡ, батыр рухлы. *Өрәйле кеше.*

**ӨРӘК** *и.* **1.** Иҫке хөрәфәтсә үлгән кешенең шәүлә булып күренә торған рухы, йәне. *Енләнеп улгәс, уның [Ғәлимәнең] өрәге йөрөй икән, ут булып, Фәхри бабайҙарҙың мөрйәләренән ингән икән, тип тә һөйләйҙәр.* М. Ғафури.

**2.** *кусм.* Ҡотто алырлыҡ ҡурҡыныс зат; бапаҡ. *[Әмир — Фатимаға:] Һеҙҙең зат, ... караңгы төшһә, беҙҙең заттан, шайтан белһен, әллә нимәгә курка. Ниңә шулай беҙҙе өрәккә әйләндерәһегеҙ.* Х. Ғиләжев. *Аслык быуҙы. Уга туҙҙек... Кара көйөп, какландык беҙ — әйтерһең дә ике өрәк.* М. Кәрим.

**ӨРӘШӘН** *р. диал* Ифрат.

**ӨР-ЯҢЫ** *с.* Яңы һүҙенең көсәйтеү формаһы; яп-яңы. *Өр-яңы кейем.*

**ӨС** *төп һ.* **1.** 3 һаны. *Өс йөҙ. Өс өсөң тугыҙ. Өстән бер. Өстән ике.* ■ *Өс тигәс тә ни яман? Өлгөһөҙ бескән тун яман* (Ҡобайырҙан). / Кем йәки нәмәнең 3-кә тиң иҫәбе. *Өс бала. Өс бөртөк. Өс өлөш. Өс тапкыр. Өс катлы йорт.* ■ *[Һылыу — Миңлебайга:] Атак.. беҙ кешенән кәм торабыҙҙыр шул — һауырга быҙаулы өс һыйырыбыҙ бар, дурт бейәбеҙ бар.* Т. Йәнәби. *Батша өс кыҙын өс егеткә биреп, ҙур туй яһай* (Әкиәттән).

**2.** *и. мәг.* Биш баллы баһа системаһындағы «уртаса» билдәһе. *Өс алыу. Өс куйыу.* ■ *Беҙҙең ваҡ балаларыбыҙ кумәк. Зәйтунәбеҙгә дәрес әҙерләргә шулар камасаулай, югиһә өскә укый торған бала тугел ул,— тине бер апай.* Ә. Гәрәев.

**3.** *и. мәг. әйл. ф.* Мосолман динендә: кеше үлгәндең өсөнсө көнөн билдәләп уҡыған аят. *Өсөн укытыу. Өсөнә сакырыу.* ■ *Көнһылыуҙы кумәләр. Әсәһе тик кыҙының өсөн укытканда гына килеп етә* (Хикәйәттән). *Картты куйып, өсөн уткәреп, етеһен укытыуга, Айтуган менән Көнтуганга икенсе бер кайгы тыуа, ти, әсәләре улә, ти* (Әкиәттән).

**ӨСАЯҠ** *и. кар.* **өстаған.**

**ӨСБОСМАҠ** *и. диал.* Өсмөйөш.

**ӨСБЫУЫН** *и. мат.* Өс алгебраик аңлатманың ҡушылдығы йәки айырмаһы. *Квадрат өсбыуын.*

**ӨСБЫУЫНЛЫ** *с. мат.* Өсбыуындан торған. *Өсбыуынлы тигеҙләмә.*

**ӨСЙӘН** *и. һөйл.* Организмда матдәләр алмашыныуы боҙолоу арҡаһында һөйәк һәм нервы системаһының үҫешенә кире йоғонто яһаған балалар ауырыуы; рахит. *[Хәлимә — Мәгфурәгә:] Ҡарасәле апай, бик йөҙәнем бит бынау малайҙан. Бер тынмай илай бит. Эсе лә каты булып, кубеп тик тора. Әллә өсйән булдымы икән?* Һ. Дәүләтшина.

**ӨСКӨЛ** *с.* **1.** Өс мөйөшлө. *Өскөл яулык.* // *Өскөл итеү.* ■ *Көҙгә саклы Зарифтан өскөл хаттар килеп торҙо, унан тукталып калды.* Я. Вәлиев. *Сәлмән еңеүенә ышанган кеше төҫлө, шатлыклы йылмайып, малайҙарга караны. Уның ирендәрендә өскөл яһалды. Бынан ... «барыбер мин алда буласакмын» тигән һуҙҙәрҙе укып була ине.* К. Мәргән.

**2.** *и. мәг. кар.* **өсмөйөш.**

**ӨСКӨЛЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Өс мөйөшлө итеү. *Ауыҙҙы өскөлләндереу.*

**ӨСКӨЛЛӘНЕҮ** *к.* Өс мөйөшлөгә әйләнеү, өс мөйөшлө булыу. *Был һуҙҙе ишеткәс, Этколдоң .. куҙҙәре өскөлләнеп китте.* Ғ. Дәүләтшин. *Өфө яйлаһының көньяк ситенә Ҡариҙел буйлап, өскөлләнеп, урманлы дала килеп инә.* М. Хисмәтов.

**ӨСКӨЛЛӘҮ** *к.* Өс мөйөшлө итеү. *Өскөлләп конверт яһау.*

**ӨСҠАТ** *и. биол. кар.* **осҡат.** *Өскат агасы.*

**ӨСЛӨ** *с.* **1.** Үлсәме өс берәмеккә тиң. *Өслө филтә. Өслө шәм. Өслө калуш.* ■ *Шәмсиә һөйләнә-һөйләнә өслө һукыр шәмгә ут алып, сәй әҙерләргә кереште.* В. Исхаков.

**2.** *и. мәг. кар.* **өс** 2. *Өслө алыу. Өслө куйыу. Өслөгә укыу.* ■ *Бөгөн рус теленән диктантка беренсе тапкыр өслө алдым. Укытыусы мактап та ебәрҙе.* К. Кинйәбулатова.

**ӨСЛӨК** *и.* Өс һумлыҡ аҡса. // *Өслөк акса.* ■ *Юлай кеҫәһенән ике өслөктө тартып сыгарҙы.* И. Ғиззәтуллин.

**ӨСЛҮБ** *[гәр.] и. иҫк.* **1.** Ысул. *Иҫбатлау өслубе.*

**2.** Стиль. *Яҙыу өслубе.*

**ӨСЛӘП** *сама һ.* Өс тирәһе, өскә яҡын.

**ӨСЛӘТӘ** *р.* Өс тапҡыр, өс тапҡырға, өс тапҡыр артыҡ. *Өсләтә артык. Өсләтә иҙеу. Өсләтә кәмәтеу. Өсләтә киммәт.* ■ *[Айбулат:] Был приказчик эфәнделәр, бында беҙгә килеп, былай ҙа өсләтә иҙелеп, быуаттар буйына артта калган башкорт халкының .. әле генә кояш яктыһына*

*асылырға торған күҙҙәрен тиҙерәк .. томаларға килгәндәр.* Һ. Дәүләтшина.

**ӨСМӨЙӨШ** *и.* **1.** Өс эске мөйөш яһап үҙ-ара киҫешкән өс һыҙыҡ менән сикләнгән геометрик фигура. *Йәйенке өсмөйөш. Ҡыҫыҡ мөйөшлө өсмөйөш. Ҡамалған өсмөйөш. Тура мөйөшлө өсмөйөш.*

**2.** Шул рәүештәге һәр төрлө нәмә. *Ҡыр ҡаҙҙары ҡаңғылдағаны ишетелде, Рамазан, ҡулын ҡаш өҫтөнә ҡуйып, көньяҡҡа табан киткән йәнле өсмөйөшкә оҙаҡ ҡарап торҙо.* Ә. Вәли. *Баҫыуҙарҙа өсмөйөш таҡҡан тракторҙар ҡар тота.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 3 апрель.

**ӨСМӨЙӨШЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** *ҡайт. ҡар.* **өсмөйөшләү.**

**2.** *төш. ҡар.* **өсмөйөшләү.**

**ӨСМӨЙӨШЛӘҮ** *ҡ.* Нимәнелер өс мөйөшлө итеү; өскөлләү. *[Тракторист] урта ыҙанды өсмөйөшләп һөрөп ҡуйҙы.* Р. Солтангәрәев.

**ӨСӨН** *бәйл.* **1.** Эштең, хәрәкәттең маҡсатын йәки маҡсат ителгән нәмәне күрһәткәндә ҡулланыла. *Күрер өсөн ҡайтыу. Ҡайтмаҫ өсөн китеү. Уйын-көлкө өсөн йыйылыу.* ■ *Телефонистарға ярҙам итеү өсөн Новиковты ебәрергә булғандар.* Д. Юлтый. *Кейеҙбай бармағындағы йөҙөктө күрһәтмәҫ өсөн бер генә ҡулын күтәрә* (Әкиәттән). *Ҡарағай ҙа үҫер ай йәм өсөн, бал ҡорттары осор бал өсөн* (Халыҡ йырынан). / Маҡсатҡа әйләнгән көслө теләкте белдергәндә ҡулланыла. *Белһәң ине һин уның аҡ күңеленең йомшаҡлығын, бер күрер өсөн был көндәрҙә һиңә ғашиҡлығын.* Ш. Бабич.

**2.** Берәй нәмәнең нимәгә тәғәйенләнгәнен күрһәткәндә ҡулланыла. *Иҫтәлек өсөн биреү. Ҡышҡылыҡ өсөн утын әҙерләү.* / Кемдеңдер эш, тормош йүнәлешен күрһәткәндә ҡулланыла. *Тормош өсөн яралыу.* ■ *[Булат:] Тыуһа, эш өсөн тыуа ла ҡуя ҡайһы бер кеше.* Б. Бикбай. *Донъя ҡайғыларын бик күп күрҙем, күрер өсөн тыуған баш икән* (Халыҡ йырынан). / Ниҙеңдер мөнәсәбәте ҡағылған кеше йәки нәмәне күрһәткәндә ҡулланыла. *Беҙҙең өсөн файҙалы.* ■ *Әҙерләйһен алғы көндәр өсөн көрәшселәр — ҡыҙыл батырҙар.* Ғ. Амантай. *Ыласындай зирәк бул, ирең өсөн терәк бул* (Туй йырынан).

**3.** Берәй эш-хәлдең сәбәбен йәки сәбәп булған нәмәне күрһәткәндә ҡулланыла. *Эш яратҡан өсөн .. арыуын да, ауырыуын да онотоп, [һөнәрсе] һаман эшләгән.* З. Биишева. *Мөгөҙө өсөн һәләк булыр боланы бар Балҡан тау.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». **Ни өсөн** 1) эш-хәлдең сәбәбенә ҡарата ҡуйыла торған һорау хеҙмәтен үтәй; ниңә, нишләп. *Зыяны үлтыртып ҡуйғандар. Ниңә? Ни өсөн?* М. Тажи; 2) тултырыусы урынына килә торған һорау алмашы хеҙмәтен үтәй; ниңә, нишләп. *Ни өсөн эшләгәнде белеү.* **Ни өсөндөр** билдәһеҙ сәбәпте белдергән хәл хеҙмәтен үтәй; ниңәлер, нишләптер. *Ни өсөндөр хатҡа яуап булманы.* **Ни өсөн тиһәң** сәбәп һөйләмдә теркәүес итеп ҡулланыла; сөнки. *[Батша:] Был уйың барыц сыҡмаҫ, ни өсөн тиһәң, ҡалын түләргә хәлең юҡ һинең* (Әкиәттән). **Шуның өсөн** эштең, ҡылыҡтың һөҙөмтәһен, сәбәбен күрһәткән хәл хеҙмәтен үтәй; шуға күрә. *Әсәһе бик ышанып бөтмәй, шуның өсөн ул ҡыҙынан .. ант иттерә* (Әкиәттән). / Эшкә, ҡылыҡҡа нигеҙ биргән нәмәне күрһәткәндә ҡулланыла. *Юҡ өсөн көйөү.* ■ *Июль, һиңә мең-мең рәхмәт тыған тулы гөлөң өсөн.* И. Әхтәмьянов. *Ҡомһоҙлого, һаранлығы өсөн уны Һаранбай тип йөрөтөр булғандар, ти* (Әкиәттән). *— Был изгелегең өсөн нимә һораһаң, шуны бирәбеҙ* (Әкиәттән).

**4.** Берәй эш йәки нәмәнең кем, нимә файҙаһына йүнәлтелгәнен күрһәткәндә ҡулланыла. *Күңел өсөн эйтеү. Үҙ рәхәтең өсөн йәшәү.* ■ *Ҡыҫҡырмасы, кәкүк, ай яҡында, кәкүк өсөн түгел тал, тирәк* (Халыҡ йырынан). / Берәй эш йәки нәмәнең кем, нимә мәнфәғәтенә бағышланғанын күрһәткәндә ҡулланыла. *Ил өсөн үлеү.*

**5.** Эшләгән эштең йәки түләүҙең нимә хаҡына булғанын күрһәткәндә ҡулланыла. *Алған аҡса өсөн эшләү. Бала өсөн ярҙам алыу. Ҡартлыҡ өсөн пенсия алыу. Утын өсөн түләү.* ■ *Хәҙер ул бөтә тапҡан-таянғанын Нинаның уҡыуы өсөн бөтөрә.* Д. Юлтый. *[Гәрәй — Саҡайға:] Түрәлегең өсөн иген тейәләр бит?* Б. Бикбай. *[Батша:] Ҡыҙ өсөн ҡалын түләрлек хәлең юҡ бит һинең* (Әкиәттән). / Ниндәйҙер эштең кем, нимә хаҡына башҡарылғанын күрһәткәндә ҡулланыла. *Аҡса өсөн йәнен бирә. Бала өсөн ҡайғыра.* ■ *Тәхет өсөн китә алыш-тартыш, хан булырға теләй һәр түрә.* Б. Вәлит. *Беҙҙең генә өсөн кем илаһын, эс бауыркайҙары өҙөлөп* (Халыҡ йырынан).

**6.** Берәй эштең кем урынына, нимә иҫәбенә башҡарылғанын күрһәткәндә ҡулланыла. *[Бай — һалдатҡа:] һинең өсөн һаҡта мин торормон* (Әкиәттән).

**7.** Ниҙеңдер ғәмәлләштереү сараһын, шартын күрһәткәндә ҡулланыла. *[Батша:] Эште гәҙел хөкөм итеү өсөн мин ул ҡыҙҙарҙы үҙем күрергә тейеш* (Әкиәттән).

◆ **Исем өсөн** *ҡар.* **исем.**

● *Алда булыр туй өсөн алдан бейей башлама.* Әйтем. *Бай бай өсөн тырышыр.* Әйтем. *Иртә килгән урын өсөн, һуңға ҡалған тамаҡ өсөн.* Әйтем. *Йыртыҡ кейем ямаулыҡ өсөн яҡшы.* Мәҡәл. *Һөймәҫеңдә һөйөрһөң һөйгәнеңдең хаҡы өсөн.* Әйтем. *Эшләүең кеше өсөн булһа ла, өйрәнеүең үҙең өсөн.* Әйтем.

**ӨСӨНСӨ** *рәт һ.* **1.** Урын тәртибе 3 менән билдәләнгән. *Өсөнсө кеше. Өсөнсө мәсьәлә. Өсөнсө өй.* ■ *Уҡытыусы Зәйнәп .. ишек аша күренгән өсөнсө бүлмәләге яңы кешеләргә ҡарап, тәрәп уйға батҡан.* Һ. Дәүләтшина. *Батырҙар .. өсөнсө тәүлектә генә йүгерешеп, кире әйләнә торған ергә барып еткәндәр* (Әкиәттән). **Өсөнсө бүлек** революцияға тиклемге Россияла Николай 1 заманында төҙөлгән дәүләт политик полицияһының юғарғы идараһы. **Өсөнсө гудок** поезд, пароходтың ҡуҙғалып китеүен белдергән һуңғы сигнал. *Бына өсөнсө гудок та булды. Дебаркедерҙың баҫмаһын алдылар. Пароход мыҙылып ҡына ярҙан ситләшә башланы.* М. Тажи. **Өсөнсө звонок** театр, кино башланыуын белдергән һуңғы сигнал. **Өсөнсө йыл** бынан өс йыл элек; элекке йыл. **Өсөнсө көн** бынан өс көн элек; элекке көн. *Ошо арала Фәтих та ҡайтып төшөр инде.. Өсөнсө көн хат килде.* Х. Ғиләжев. *Ҡарт өсөнсө көн күрше ауылдағы*

*ҡыҙына киткәйне, ҡайтҡаны юҡ.* Д. Юлтый. **Өсөнсө ҡатлам** *тар.* феодаль Францияла бер ниндәй өҫтөнлөк менән файҙаланмаған, һалым түләгән түбәнге ҡатлам. **Өсөнсө осор** кайнозой эраһының беренсе осоро.

**2.** Сифаты төбән булған. *Өсөнсө сортлы сәй. Өсөнсө класлы каюта.*

**3.** *и. мәғ.* Ашағандан һуң бирелә торған тәмле эсемлек (мәҫ. сәй, кофе, какао, компот]. *Өсөнсөгә йөҙөм һуты бирҙеләр.*

**ӨСӨНСӨНӘН** *инш.* Нимәнелер бер-бер артлы һанап яҙғанда йәки һөйләгәндә өсөнсө пункт икәнен күрһәтеү өсөн ҡулланыла.

**ӨСПӘТ** *и. диал. ҡар.* **шүмән** [2].

**ӨСТАҒАН** *и.* **1.** Бер яҡ баштары беркетелеп, икенсе баштары ергә ултыртылған өс таяҡ. *Әүернә өстағаны.* ■ *[Мәғфүрә] Диләгә һыу килтерергә ҡушып, өстағанға ҡаҙан аҫып, ут яҡты.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ҡаҙан, суйын ултырта торған өс аяҡлы дүңгәләк тимер. *Иң ярлы өйҙәрҙә өстаған өҫтөндә, саҡҡыларын сәсрәтә-сәсрәтә, төтөнләп ҡайын сыраһы яна.* Х. Кәрим. *[Һылыу ҡортҡа:] Ҡартым мәрхүмкәйҙең өстағаны ине.. Был бала өйҙө ҡыйыҡлатып, мейес сығарып ҡуйһа, кәрәге лә бөтөр инде был ҡомартҡының, ә?* Т. Йәнәби.

**ӨСТАҒАНЛАУ** *ҡ.* Өстаған ҡуйыу. *Көлтәне өстағанлап өйөү.* ■ *Ҡытлыҡ йылды арыштың тамам өлгөрөп, еме ҡатҡанын көтөп ала алмай халыҡ. Әүен баҙы ҡаҙыла ла уның өҫтөнә йәм-йәшел көйө арыш көлтәләре өстағанлап, эсе ҡыуыш сүмәлә итеп өйөлөп киптерелә.* Ф. Иҫәнғолов.

**ӨСТОЯҠ** *и. диал. ҡар.* **өстаған** 2. — *Егет, ниңә моңайып тораһың? — тип сыулашты өстояҡҡа ҡаҙан аҫып аш бешереп маташҡан ҡыҙҙар.* Й. Солтанов.

**ӨСӘР** *бул. һ.* Һәр бере өскә тиң. *Өсәр алма. Кеше башына өсәр һум.* ■ *Әлек йән башына өсәр бот иген бүлгәндә артыҡ алыусыларға хәҙер иген теймәне.* Б. Бикбай. *[Мәғфүрә] Айбулат алып ҡайтҡан мампасыйҙы кеше башына өсәр бөртөктән генә бүлеп һалды.* Һ. Дәүләтшина.

**ӨСӘРЛӘП** *р.* Өсәр итеп, өсәрҙән. *Өсәрләп барыу. Өсәрләп бүлеү. Өсәрләп теҙелеү.* ■ *Шалтыр-шолтор иткән арбалар, өсәрләп теҙелгән атлылар, яңғыҙлы һыбайҙар ... урамға тулып китте.* Һ. Дәүләтшина.

**ӨСӘРЛӘШЕП** *р.* Өсәр-өсәр бүленеп, өсәр-өсәр булышып. *Өсәрләшеп баҫыу. Өсәрләшеп килеү. Өсәрләшеп тороу.*

**ӨСӘҮ** *йыйн. һ.* Өс кеше йәки нәмә. *Өсәү барыу. Беҙ хәҙер өсәү инде.* ■ *Ул кис Байғужа, Буранбай, мин — өсәү бер өйҙә ҡундыҡ.* Д. Юлтый. *Батырҙар өсәү булды килә-килә.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *Өсәүһе бергә оҙаҡ барғас, .. өс юл сатына килеп туҡтағандар* (Әкиәттән).

**ӨСӘҮЛӘП** *р.* Өс кеше бергә. *Күрше Богдан ауылынан ике егет һәм мин — өсәүләп Ырымбур яғына йәйәү сығып киттек.* Т. Йәнәби. *Былар өсәүләп юлға сыға* (Әкиәттән).

**ӨСӘҮЛӘШЕП** *р.* Өс кеше бергә. *Өсәүләшеп эшләү.* ■ *Мәғфүрә, Шәһиҙә һәм Гөлйөҙөм өсәүләшеп шаршау артында сәй эстеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**ӨСЪЯК** *и.* Иҫке өйгә ҡушып буралған өс стена. *Өсъяҡ һүгыу.*

тараф; *киреһе* аҫ. *Өҫтән ҡояш ҡыҙҙыра.* ■ *Ел көсәйҙе, өҫтән ҡар яуа башланы.* Ә. Вәли. *Заятүләк .. ҡошон сөйөп ебәрә. Ҡош ҡаҙҙарҙан да өҫкә күтәрелә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». *Бейә Аҡйелекте өҫкә сөйгән, ергә алып һуҡҡан* (Әкиәттән).

**2.** Нимәлер торған, булған урын, уның ураты-лышы, уны әйләндереп алған тирә-яҡ. *Июнь ҡояшы менән ҡала өҫтө ялт итә.* С. Агиш. *Арҡа өҫкәйҙәрендә томан юҡ, япраҡ ҡына ярған имән юҡ* (Халыҡ йырынан). *Урал тауҙың өҫтөндә һуғыш та, үлеш тә бар* (Ҡобайырҙан). *Ҡайғы баҫты ауыл өҫтөн, аһ оралар, ил илай* (Бәйеттән).

**3.** Нимәнеңдер юғарғы яғындағы урын; тышҡы йөҙ, яҡ. *Арба өҫтө. Ашъяулыҡ өҫтө. Балаҫ өҫтө. Бүрәнә өҫтө. Йөк өҫтө. Йылға өҫтө. Күпер өҫтө. Өҫтәл өҫтө. Өҫтө ябылған танк.* ■ *[Ғариф карт] ыңғырсаҡ аҫтына кейеҙ һалып, өҫтөн күн менән ҡаплап ҡуйҙы.* Б. Бикбай. *Һыуға ғына төштөм, һыу алам тип, һыу өҫкәйе тора тулҡынып* (Халыҡ йырынан). / Кәүҙәнең тышҡы яғы, йөҙө. *Өҫтәге кейем.* ■ *Минең күрән ат бейей, уйнай, өҫтөндә ултырырға мөмкин түгел.* Д. Юлтый. *Һылыу әбей улын танып ...алды ла йүгереп килеп өҫтөнә ҡолап китте.* Ғ. Дәүләтшин. *Эй, мулла абзый, .. өҫтән былай кеше төҫлө күренһәң дә, эсең-тышың тулы сеп-сей ялған менән.* Ш. Бабич. *Башҡа картуз кейҙерҙеләр, өҫкә шинель бирҙеләр* (Бәйеттән). **Өҫтөңдә туҙһын** яңы кейемде ҡотлап әйтелә. *[Баныу — Мөнирәгә:] Матур теккәндәр инде! Ҡотло булһын, өҫтөңдә туҙһын.* Ғ. Ибраһимов. / Нимәнеңдер юғарғы өлөшө. *Ҡул тирмәненең өҫтө.* ■ *Өҫтө ағас, аҫты ҡыҙыл кирбестән һалынған ике ҡатлы бейек өй эре-эре өлгөлө ун ике тәҙрәһе менән ялтырап ултыра.* Һ. Дәүләтшина. **Сынаяҡ өҫтө** *ҡар.* **сынаяҡ** 1. *Шәфәҡ сынаяҡ өҫтөн түңкәрҙе.* Б. Бикбай. / Нимәнелер юғарынан ҡаплап ябып торған икенсе нәмә; ябыу, япма. *Бәлеш өҫтө. Көймә өҫтө.*

**4.** Ҡалҡыуҙың юғарғы, бейек яғы. *Тау өҫтө. Яр өҫтө. Өҫкә менеү. Өҫтә тороу. Өҫтән төшөү.* ■ *Тау өҫтөнә шыршылар үҫкән.* Ғ. Хәйри. *Урал аҫты алтындыр, өҫтө шәфәҡ балҡыйҙыр.* Ш. Бабич. *Аҡъял батыр бүләк итеп бирелгән ер аҫты хазинаһын .. арҡан осона таға торған, өҫтән тартып ала торғандар* (Әкиәттән). / Һыу, һауа ағымының билдәле урындан юғарыраҡ ятҡан яғы, үрге яҡ. *Өҫтән бүрәнә ағыҙыу.* // Өҫ яҡ. ■ *Өҫтән, ҡайҙандыр алыҫтан, икмәк, йүкә, картуф, балыҡ тейәгән баржалар килә.* К. Мәргән.

**5.** Һөттөң йөҙөн ҡаплаған май ҡатламы. *Өҫтө алынған һөт.* **Һөт өҫтө** *диал.* ҡаймаҡ. *[Еңгә:] Бер нәмә урынында тормай: һөт өҫтө тиһеңме, ҡатыҡ тиһеңме, береһен [Ғәли] ҡалдырмай!* М. Ғафури.

**6.** Власҡа эйә булған вазифалы урын һәм унда эшләгән кешеләр. *[Мырҙағәле:] Өҫтән шаярталар [түрәне], өҫтән, беҙ әйткәнгә ҡолаҡ һалмай ҙар* С. Агиш. *Хәҙер Индриль фәлсәфәһе өҫтә*

*шаулай, ул хәҙер һалдаттар араһында юл өңгән.* Д. Юлтый.

**7.** Айырым бер эш-хәл барған йәки башҡарылған мәл. *Аш өҫтө. Бесән өҫтө. Ҡыш өҫтө. Урак өҫтө. Уттай эш өҫтө.* ■ *Ҡара әле бынауы Зыяны: ураҡ өҫтөнә килен төшөрҙөмө?* М. Тажи. *[Ғариф ҡарт — Тимергә:] Әйҙә, Самат, аш өҫтөндә килдең әле. Табындың түрендә бул.* Б. Бикбай. **Ҡәбер өҫтө** *ҡар.* **ҡәбер. Мәйет өҫтө** *ҡар.* **мәйет.** / Билдәле бер йәш тулған мәл. *Алтмыш өҫтөнә баҫыу. Илле өҫтөндәге ир.* ■ *Яхин быйыл сак утыҙҙың өҫтөнә баҫҡан ир. Әле йәш булыуына ҡарамаҫтан, тәненә ит ултырып бөткән.* Н. Мусин.

**8.** Кейгән кейем, кейем-һалым. *Өҫтө бөтәйтеү. Өҫтө сисеү.* ■ *[Һалдат:] Өҫтәрҙе ҡалайтып киптерәбеҙ инде.* Д. Юлтый. *Ҡайтып төштө Ғилуан.. Бары бер йәй көттө көтөү — нык бөтәйгән өҫтө.* Н. Нәжми. **Тамаҡ тук, өҫ бөтөн** етеш тормош хаҡында әйтелә. *Хәҙер ҡыҙҙың өҫтө бөтөн, тамағы тук, көңеле генә китек, ти* (Әкиәттән).

**9.** 3-сө зат эйәлек, төбәү, сығанаҡ һәм урын-ваҡыт килеш аффикстары менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*ҡар.* **өҫтөнә, өҫтөнән, өҫтөндә**).

♦ **Аяҡ өҫтө** *ҡар.* **аяҡ** [1] **1. Баҙ өҫтө** *ҡар.* **баҙ** 1. **Бар өҫтөнән** булған көйө, була тороп. *Бар өҫтөнән матурлап кейенмәй йөрөй.* **Баш өҫтө** *ҡар.* **баш. Ил өҫтө** *ҡар.* ил [1]. **[Кемдеңдер] өҫтөндә тороу** кеше өйөндә фатирҙа йәшәү. *Рамазан, тейешле аҡсаһын алып, ваҡытында бирә барһа ла, кеше өҫтөндә оҙаҡ тороуына ҡыйынһына, .. тартынып ҡына ашай.* Ә. Вәли. **Ҡыл өҫтөндә** *ҡар.* **ҡыл. Өҫкә алыу** эште, бурысты үҙ яуаплылығына алыу. *Уҡытыусы баланы тәрбиәләү эшен үҙ өҫтөнә алды.* **Өҫкә ауҙарыу** ғәйепте, яуаплылыҡты башҡаларға ҡайтарып ҡалдырыу, башҡаларға һылтаныу. **Өҫкә бысраҡ өйөү** яла яғыу, нахаҡҡа ғәйепләү. **Өҫкә сығыу** 1) халыҡҡа беленеү; фаш булыу. *Судта Ваһаптың эше өҫкә сыҡҡас, ауыл халҡы бик кәнәғәт булды.* Ж. Кейекбаев; 2) үҙеңдән тейеш булып ҡалыу (хөкүмәт малына ҡарата). *Һатыусының өҫтөнә сыҡҡан.* **Өҫтән йөҙөү** ниндәйҙер мәсьәләне насар белеү, асылын аңламау. *[Кәбир:] Ғәфү ит, Сабир, был тәңгәлдә һин өҫтән йөҙәһең кеүек тойола миңә. Ә бында бит төптәнерәк ҡарарға кәрәк.* Я. Вәлиев. **Өҫтән төшөү** яуаплылыҡтан алыныу. *Минең өҫтән бурыс төштө. Донъя хәстәре ололар өҫтөнән төштө.* **Өҫтә тороу** нимәгәлер яуаплы булыу, яуаплылыҡ тойоу.

**ӨҪ** [2] *и.* Ғәрәп яҙыуында хәреф башына ҡуйыла торған билдә; кәсрә. *Әй, осетин бәк Салих, һеҙгә лайыҡ ат күрһәтәм: «мим»гә өҫ, «жим»-гә сәкен һәм «нон» — өтөр, «нон» — сәкен.* Ш. Бабич.

**ӨҪ-БАШ** *и. йыйн.* Өҫкә кейгән кейем, өҫ кейеме. *Өҫ-башты алмаштырыу. Өҫ-башты бөтәйтеү. Өҫ-башты ҡарау. Өҫ-башты йүнәтеү. Өҫ-башты ямау.* ■ *Ғәлиәкбәрҙең өҫ-баш та бик шәп бит инде: ҡаракүл яғалы өр-яңы пальто, ҡаракүл бүрек, аяҡта һары күн һыҙмалы, ҡунысы ҡайтарылған аҡ бурка.* З. Биишева. *Әфисәрҙе әллә ҡайҙа илтеп ташлағандар. Өҫ-башы йыртылып бөткән, яланаяҡ-яланбаш ҡалған* (Әкиәттән).

**ӨҪ-БАШЛЫҠ** *и. йыйн. һөйл.* Бөтә төр кейенер кейем. *Өҫ-башлыҡ алыу. // Өҫ-башлыҡ аҡса.* ■ *[Мәғфүрә — Айбулатҡа:] Әлле быйылға ошонда Ныяҙгол ҡайнағаларҙа ғына эшләп тораһыңмы? Бәлки бында ла өҫ-башлыҡ эшләй алырһың.* Һ. Дәүләтшина.

**ӨҪКӨ** [1] *с.* **1.** Ниҙәндер өҫтәрәк, юғарыраҡ урынлашҡан; юғарғы. *Өҫкө ирен. Өҫкө кәштә. Өҫкө урам. Өҫкө яҡ.* ■ *Беҙ кис менән магазиндың өҫкө ҡатына йыйылдыҡ.* С. Агиш. *Ишек, өҫкө күгәненән һурылып сығып, салыш аҫылынып тора.* Б. Бикбай.

**2.** Тыштан, нимәнеңдер өҫтөнән кейелә торған. *[Сергей] менән икәүләшеп тиҙ генә улымдың өҫкө кейемен ыскындырҙыҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *күсм.* Тормош хәле яҡшыраҡ, юғарыраҡ торған; юғарғы. *Өҫкө ҡатлам халыҡ.*

**ӨҪКӨ** [2] *и. диал.* Ҡотҡо, отҡо. *Ҡулаҡ өҫкөһө.*

**ӨҪКӨТӨҮ** *ҡ. диал. ҡар.* **ҡотортоу** 2. *Милли буржуазия .. халыҡты тағы ла нығыраҡ ағыуларға, башҡа милләт халҡына ҡаршы өҫкөтөргә тотона.* К. Мәргән. *[Урал — Шүлгәнгә:] Бөтә илде һыу иттең, кеше ҡанын ҡойорға дейеүҙерҙе өҫкөттөң.* «Урал батыр».

**ӨҪКОРМА** *и.* Йәмғиәттең экономик базисын билдәләгән ижтимағи идеялар һәм политик, эстетик, философик, дини, хоҡуҡи ҡараштар, уларға хас ойошма һәм идеологик ижтимағи мөнәсәбәттәр йыйымы. *Политик өҫкорма.*

**ӨҪЛӨК** [1] *и.* Тирмәнең өҫкө кейеҙе.

**ӨҪЛӨК** [2] *и. ҡар.* **өҫкорма.**

**ӨҪЛӘТЕҮ.** *ҡ. диал.* Һөсләтеү. *Бер-береңә өҫләтеү. Эт өҫләтеү.*

**ӨҪЛӘҮ** [1] *ҡ.* Ниҙеңдер өҫтө буйлау. *Диңгеҙ өҫләп үтә елдәр.* Ф. Рәхимғолова.

**ӨҪЛӘҮ** [2] *ҡ. диал. ҡар.* мәскәүләү [2]. *Шунда уҡ Эткол бай бисәһенең батшай сапаны, баса туны, ике итәк өҫләп теккән атлас, сатин, ебәк ҡулдәктәре элеп ҡуйылған.* Ғ. Дәүләтшин.

**ӨҪТ** *и. ҡар.* **өҫ** [2].

**ӨҪТӨН** *с.* **1.** Ниндәйҙер яғы менән башҡаларҙан юғарыраҡ торған. *Өҫтөн кеше. Өҫтөн синыф. Өҫтөн булыу. Өҫтөн итеү.* ■ *Ул [Йәнтимер] эштә булмаһа, аҡыл яғынан өҫтөн булырға тырыша.* С. Агиш.

**2.** *р. мәғ.* Бүтән нәмәнән юғары, артыҡ. *Өҫтөн ҡуйыу. Өҫтөн тороу. Өҫтөн тотоу.* ■ *Сафлыҡтарын башҡорт һылыуҙары йәндәренән өҫтөн ҡуйғандар.* Р. Шәкүр. *Бөтә йәштәр уға [Талипка] ышана, уның һүҙе өҫтөн һанала.* Б. Вәлит. *[Батша — Кейеҙбайға:] Йүгереүҙә лә, көрәштә лә өҫтөн сыҡҡан һинме?* (Әкиәттән).

**ӨҪТӨНДӘ** *бәйл. функцияһында* **1.** Эш-хәрәкәт нимәнеңдер өҫкө өлөшөндә башҡарылғанын, урынлашҡанын белдергәндә ҡулланыла. *Бесән өҫтөндә аунау. Китап өҫтәл өҫтөндә ята.* / Эш-хәрәкәт нимәнәндер өҫтә, юғарыла барғанын белдергәндә ҡулланыла. *Аҡселән өҫтөндә таң.* Б. Бикбай. *Урман өҫтөндә бер түп аҡ күгәрсен кәйелеп-кәйелеп уйнап йөрөй* (Әкиәттән).

**2.** Эш-хәрәкәт ниндәй йүнәлештә барғанын белдергәндә ҡулланыла. *Әҫәр өҫтөндә эшләү.*

■ *Шул уйҙар өҫтөндә баш ватып, интәштәр эргәһенә кайттым.* Д. Юлтый.

**3.** Эш-хәрәкәттең дауамлылығын күрһәткәндә ҡулланыла. *Старшина ябырылып йыйылған халыкты күреп, таралырға ҡушты. .. Халык һаман йыйылыу өҫтөндә булды.* Т. Хәйбуллин.

**ӨҪТӨНЛӨК** *и.* **1.** Башҡа нәмәнән ыңғай яғы менән айырып торған, өҫтөн иткән, юғары ҡуйған сифат. *Йәнгелдең Әбйәлил районындағы башка йылғаларға ҡарағанда бер өҫтөнлөгө бар: ул кыуан йылдарҙа ла коромай.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 12 ноябрь.

**2.** Көс-хоҡуҡ йәһәтенән башҡаларҙан өҫтөн булған хәл. *Өҫтөнлөк алыу. Өҫтөнлөк биреү. Өҫтөнлөк тотоу.*

**3.** Башҡалар өҫтөнән хакимлыҡ иткән хәл. *Финанс өҫтөнлөгө. Сауҙа өҫтөнлөгө. Хәрби өҫтөнлөк. Өҫтөнлөк булыу. Һауала өҫтөнлөк итеү (хәрби). Өҫтөнлөк беҙҙең яҡта.*

□ **Өҫтөнлөк итеү** (*йәки* **һөрөү**) 1) күләм-дәрәжә йәһәтенән өҫтөн булыу. *Ҡатын-кыҙға ҡарата кире ҡарашты белдергән мәҡәлдәрҙең өҫтөнлөк итеүенә ҡарап кына ниндәйҙер дөйөм һығымтаға килеү дөрөҫ булмаҫ.* Ф. Нәҙершина; 2) башҡаларҙы буйһондороу, хакимлыҡ, башлыҡ итеү.

**ӨҪТӨНЛӨКЛӨ** *с.* Күләм-дәрәжәһе йәки әһәмиәте яғынан юғары; өҫтөн. *Ауыр промышленносты өҫтөнлөклө үҫтереү. Өҫтөнлөклө темп.*

**ӨҪТӨНӘ** *бәйл. функцияһында* **1.** Эш-хәрәкәттең нимәнеңдер өҫкө яғына табан йүнәлеүен белдергәндә ҡулланыла. *Сумып, һыу өҫтөнә йөҙөп сығыу.*

**2.** Берәй эш-хәрәкәткә өҫтәп тағы нимәләр эшләнгәнен күрһәткәндә ҡулланыла. *Биш бала өҫтөнә иргә сығыу. Көндәш өҫтөнә алыу.* ■ *Теге аҡһаҡ секретарь, сельсоветлыҡ итеү өҫтөнә, ауылдағы мөтәүәлиҙәрҙең секретары булған.* Д. Юлтый. *[Ҡутыр башлы Ҡолтор таҙ:] Ҡарт ҡатыным өҫтөнә һине йәш бисә итеп алырға күп ҡалманы инде* (Әкиәттән).

**3.** Нимәләр бар көйө шуға тағы шул нәмә өҫтәлгәнде күрһәткәндә ҡулланыла. *Ҡайғы өҫтөнә ҡайғы. Суп өҫтөнә суп. Тауыш өҫтөнә тауыш. Ике аты бар өҫтөнә тағы берҙе алған.* ■ *Алтын өйгә бер нисек тә үтеп инмәле түгел: бик өҫтөнә бик, һаҡ өҫтөнә һаҡ ҡуйылған* (Әкиәттән).

♦ **Ҡарышҡан** (*йәки* **үсеккән**) **өҫтөнә** үс итеп киреһен эшләгән де күрһәткәндә әйтелә. *Улар [ауылдар], үсеккән өҫтөнә юрый ултырған һымаҡ, йылғаның йәшеллектәрҙән мәхрүм ягын һайлап, .. һыу буйлап теҙелеп киткән.* Ғ. Дәүләтшин. **Өҫтөнә баҫыу** 1) тейешен, дөрөҫөн күрһәтеү, ысынға тап килтереү. *[Муйыл:] Әйтерһең берәү алдан һөйләп ҡуйған. Ғәжәп шикелле бына, өҫтөнә генә баҫып әйтеп тик ултыра.* Һ. Дәүләтшина; 2) нимәгәләр тап ваҡытында килеү, килеп өлгөрөү. *Мәжлестең өҫтөнә баҫыу.* ■ *Кәбир [пятиминуткаға] идара ағзаларының да саҡырылыуын шәйләп, өҫтөнә баҫыуын аңланы.* Я. Вәлиев.

**ӨҪТӨНӘН** *бәйл. функцияһында* **1.** Эш-хәрәкәттең нимәнеңдер өҫкө өлөшөнән башҡарылыуын белдергәндә ҡулланыла. *Өҫтәл өҫтөнән алыу. Шкаф өҫтөнән төшөрөү.*

**2.** Кемдеңдер башҡаларҙан юғарыраҡ мөнәсәбәттә торғанлыҡты белдергәндә ҡулланыла. *Кеше өҫтөнән түрә булыу. Малайҙар өҫтөнән күҙәтеү.* ■ *Унлаған кеше өҫтөнән Айбулатты башлыҡ итеп, ер бүлергә сығып киттеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Кемгәлер ҡаршы йүнәлтелгән берәй эште күрһәткәндә ҡулланыла. *Кеше өҫтөнән ошаҡлау. Кеше өҫтөнән һөйләү. Кеше өҫтөнән ялыу биреү.*

**ӨҪТӨ-ӨҪТӨНӘ** *р.* **1.** Береһе өҫтөнә икенсеһен, береһен икенсеһе өҫтөнә; аҫлы-өҫлө. *Өҫтө-өҫтөнә өйөлөү. Өҫтө-өҫтөнә һалыу. Өҫтө-өҫтөнә өйөү.*

**2.** Бер-бер артлы.— *Тормошоң етеш, ашағаның бал да май, өҫтө-өҫтөнә көлдәк тектерәһең.* М. Тажи. *Апрелдең ун өсөнсө кисе, өҫтө-өҫтөнә яуҙы ҙур шатлыҡ.* Ғ. Ғүмәр.

**ӨҪТӨРӘҮ** *к. диал.* Һөйрәү, һөйрәкләү.

**ӨҪТӘЛ** [*рус.* стол] *и.* **1.** Өҫтөнә киң таҡта йәйеп яһаған йыһаз. *Аш өҫтәле. Эш өҫтәле. Өҫтәл арты. Өҫтәл аяғы. Өҫтәл тартмаһы. Өҫтәл өҫтө. Түңәрәк өҫтәл.* ■ *Өҫтәл тирәһенә йыйылып ултырҙылар ҙа, ашамлыҡтарын сығарып һалдылар.* С. Агиш. **Өҫтәл ябыуы** өҫтәл өсөн махсус эшләнгән япма.

**2.** Шул йыһаз өҫтөнә әҙерләп ултыртылған ашамлыҡ. *Лилиғә сынаяҡ, сәнске, ҡалаҡтар алып килде лә, өҫтәл әҙерләй башланы.* Ғ. Ибраһимов.

**3.** Махсус бер эш менән шөғөлләнгән ойошма йәки уның бер бүлеге. *Адрестар өҫтәле. Паспорт өҫтәле.* ■ *Кемдәрҙеңдер ғаилә башлауҙарын теркәр тағы загс өҫтәле.* Ғ. Сәләм.

♦ **Түңәрәк өҫтәл арты** бөтә ҡатнашыусылары тиң хоҡуҡлы булған рәсми йәки дипломатик ултырыш. *Түңәрәк өҫтәл артына йыйылыу.*

**ӨҪТӘЛЕҮ** *к. төш. кар.* **өҫтәү** [1]. *Иҙәндең етешмәгән таҡталары өҫтәлгән, тәҙрәнең ватыҡ быялалары ҡуйылған ине.* Б. Бикбай. *Беҙҙең һарайға тағы кешеләр өҫтәлде.* Д. Юлтый. *Ҡанды эсеп алдымы — уға [бабайға] шул йырткыстың көсө өҫтәлер булған.* «Урал батыр».

**ӨҪТӘЛМӘ** *с.* Нимәгәләр өҫтәлгән, ҡушылған; барға иш, ҡушымта булған. *Өҫтәлмә бөрө. Өҫтәлмә бәбәк. Өҫтәлмә үҫенте.*

**ӨҪТӘЛМӘЛЕК** *и. лингв.* Берәй нәмәне асыҡлап, уға өҫтәмә атама биреп килгән грамматик аныҡлаусы. *Айырымланған өҫтәлмәлек.*

**ӨҪТӘЛӘҮ** *к.* Яңынан яңыны өҫтәү. *[Бер ҡатын:] Бына Нәгим ни задание тине лә сәстерҙе, өҫтәләп-өҫтәләп задание була тиме икән!* Һ. Дәүләтшина.

**ӨҪТӘМӘ** I *и.* **1.** Нимәгәләр яңынан өҫтәп ҡуйылған, ҡушылған нәмә. *Өҫтәмә һуғыу.* ■ *Рационда силос, сенаж, иген фуражы. Ул минераль өҫтәмәләр менән байытыла.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 23 ғинуар.

**2.** Өҫтәп яҙылған яҙма йәки әйтелгән һүҙ. *Китапҡа өҫтәмәләр индереү. // Өҫтәмә рәүештә әйтеү.* ■ *Мурзиндың ҡайһы бер пункттарға .. өҫтәмәләр күрһәткәнен күп интәштәре хуплап*

*телгә ала.* Һ. Дәүләтшина. / Фәнгә, хеҙмәткә өҫтәлгән ҡиммәтле, әһәмиәтле яңылыҡ. *Өҫтәмә индереү.*

**3.** Өҫтәп түләнгән, тапшырылған йәки таратылған нәмә. *Өҫтәмә алыу. Өҫтәмә биреү. Өҫтәлмә рәүештә түләү. [Урманцев — Әмирхановҡа:] Зинһар, һеҙ миңә тағы ла бер тюк [ҡыҙыл тауар] бирегеҙ әле. Үткәндәре өсөн рәхмәт, быныһына инде өҫтәмә булыр.* С. Агиш.

**4.** Фронтҡа ярҙам итеү өсөн ебәрелгән йәки ғәскәри часты тулыландырыу өсөн килгән төркөм. *Полк үҙенең яңы өҫтәмәһен яҡшы ҡаршыланы һәм ашҡынып килгән йәш егеттәргә һуғыш техникаһын өйрәтә башланы.* «Башҡортостан батырҙары», 1959.

II *с.* **1.** Нимәгәлер яңынан өҫтәп ҡуйылған, ҡушылған. *Өҫтәмә бүлмә. Өҫтәмә дәрес. Өҫтәмә ҡыйынлыҡ.* ■ *Балалар «домна нимә ул, мартен нимә ул» тигән һорау бирәләр. Быны аңлатыр өсөн дәрес программаһына өҫтәмә сәғәт кәрәк булыр ине.* М. Тажи. *Полктар өҫтәмә блиндаждар, дзоттар төҙөгәйне.* Ә. Ихсан. **Өҫтәмә аҙыҡ** үҫемлек туҡланһын өсөн тупраҡҡа индерелгән ашлама. **Өҫтәмә ҡиммәт** *эк.* тауар хаҡының ялланған эшсе ҡулы менән үҙҙәре түккән көс хаҡынан арттырып тыуҙырылып, капиталист тарафынан үҙләштерелгән өлөшө. *Капитализм материаль байлыҡ етештереүҙе кеше ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү өсөн түгел, ә өҫтәмә ҡиммәтте өҙлөкһөҙ арттыра барыу өсөн ойоштора.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 13 ғинуар. **Өҫтәмә продукт** *эк.* материал байлыҡты ижтимағи маҡсатта етештергәндә кәрәгенән артыҡ тыуҙырылған продукттың бер өлөшө.

**2.** Өҫтәп әйтелгән йәки яҙылған. *Өҫтәмә күрһәтмә. Өҫтәмә рәүешендә әйтеү.* ■ *Өҫтәмә приказ алғас, эскадрон командиры егеттәре янына әйләнеп килде.* И. Кинйәбулатов. **Өҫтәмә сығыш** төп сығыштың айырым мәсьәләләренә туҡталған ҡыҫҡа ғына телмәр.

**3.** Өҫтәп түләнгән, тапшырылған йәки таратылған. *Өҫтәмә түләү. Өҫтәмә түләүле хат.* ■ *Колхоз һәм совхоздарға һөт һауып алыуҙың айлыҡ заданиеһын арттырып үтәгән өсөн һауынсыларға һәм мал ҡараусыларға өҫтәмә эш хаҡы түләргә тәҡдим итергә.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 7 март.

**4.** Фронтҡа ярҙам итеү өсөн ебәрелгән йәки ғәскәри часты тулыландырыу өсөн килгән. *Беҙгә өҫтәмә ғәскәр килде. Улар ҡарт ополченецтар, новобранецтар, еңел ранен булып, лазареттан сыҡҡан фронтовиктар.* Д. Юлтый.

**5.** *ҡар.* **өҫтәлмә.**

**ӨҪТӘН** *р.* Эсенә инмәй, асылына, төбөнә төшмәй; тыштан. *Өҫтән ҡарау. Өҫтән генә уйлап эш итеү.* ■ *[Айбулат:] Юҡ, ағай, улай өҫтән генә тотоп шымартмайыҡ, берәмләп һөйләп бир.* Һ. Дәүләтшина.

**ӨҪТӘН-МӨҪТӘН** *р.* Эсенә инмәй генә, асылына, төбөнә төшмәй генә; арлы-бирле. *Өҫтән-мөҫтән ҡарау. Өҫтән-мөҫтән танышыу.* ■ *Элекке Өфө губернаһының Маҡар волосындағы крәҫтиәндәр болаһы тураһында тарих биттәрендә лә өҫтән-мөҫтән генә әйтеп үтелә.* И. Ғиззәтуллин.

**ӨҪТӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **өҫтәү** [1].

**ӨҪТӘҮ** [1] *ҡ.* Булған өҫтөнә тағы ҡушыу; арттырыу. *Аш өҫтәү. Самауырға һыу өҫтәү.* ■ *Беҙ һигеҙ бала инек, ә шуға атайым менән әсәйемде лә өҫтәһәк, ун йән — ун тамаҡ тигән һүҙ.* М. Тажи. *Ниндәй нәфис иркәлек, ниндәй серле матурлыҡ өҫтәй ул һиңә [диңгеҙ].* З. Биишева. / Булған эргәһенә ҡушыу. *Өҫтәп хаҡ алыу.* ■ *[Йылан — Көмөшбайға:] һунарсыға түләгән йөҙ һумыңды ҡайтарырмын, шуға өҫтәп бер алтын балдаҡ менән бер алтын әйәр бирермен* (Әкиәттән).

● *Нәпсене һимертһәң, үҙеңә бәлә өҫтәр.* Әйтем.

**ӨҪТӘҮ** [2] *и.* Тиң түгел нәмәләрҙе алмашҡанда, бәрәбәр килтереү өсөн ҡушыла торған аҡса йәки нәмә.— *Һат ҡола ҡашҡаңды! Йөҙ һум аҡса, өҫтәүенә үҙемдең ҡара юрғаны бирәм!* С. Кулибай.

● *Өҫтәү алған эт менән, өҫтәү биргән ат менән.* Әйтем.

**ӨҪТӘҮЕНӘ, шуның өҫтәүенә** *инш.* Бер эш-хәлгә тағы ниҙер өҫтәлгәнен күрһәткәндә ҡулланыла.— *Махиән ағай, яуыз бүрене дөмөктөргәнең өсөн, һиңә үҙең ҡотҡарып алып ҡалған бынау кәзәне, шуның өҫтәүенә ике йөҙ һум аҡса бүләк итергә булдыҡ.* С. Кулибай. *[Таҙ — ханға:] Ҡыҙың ҡыҙ түгел инде хәҙер! Өҫтәүенә, үҙе теге көтөүсең менән ҡасып китергә йыйына* (Әкиәттән).

**ӨҪӘК** [*рус.* сусек] *и. диал. ҡар.* **әрйә** 1. *Өҫәккә һалыу. Өҫәктә һаҡлау.*

**ӨҪӘҢ** *с. диал.* Һонтор. *Өҫән кеше.*

**ӨТКӨС** *и.* Көйҙөрөп тамға һала йәки һыр төшөрә торған ҡорал.

**ӨТӨК** [1] *с.* **1.** Арып, йонсоп, йөнө ҡойолоп бөткән (ҡош-ҡортҡа, малға ҡарата). *Өтөк тауыҡ.* // *Өтөккә әйләнеү.* ■ *[Фәхри:] Ана, Сәрби әбейҙең бер өтөк кенә айғыры бейәмде тышаулы көйөнсә өйөрөп алып йөрөйсө.* С. Мифтахов.

**2.** *кусм.* Төҫө, ҡиәфәте, көсө, һәләте ысын баһанан түбән; меҫкен, йолҡош.— *Мине өйрәтергә һин кем? Өтөк башың менән ниңә ҡыҫылаһың?* Ф. Әсәнов. *[Әсәһе — таҙға:] — Ни ғәжәп ҡылаһың, балам, һиндәй өтөккә батша ҡыҙын бирерме һуң?* (Әкиәттән). / Әрләгәндә, кәмһеткәндә әйтелә. *[Кәрим — Сәлимгә:] Улай ярты көтөүҙе ташлап ҡасыр булғас, алып сыҡмайҙар уны, өтөк.* И. Ғиззәтуллин. **Өтөк тауыҡ** (*йәки* **этәс**) әрләгәндә, кәмһеткәндә әйтелә. *[Бер ҡыҙ:] Үҙеңде бел, йәме!.. Бахыр, һыуға төшкән өтөк этәс!* М. Тажи.

**ӨТӨК** [2] *с. диал.* Өтәлән.

**ӨТӨК** [3] *и.* Янып көйгән, өтөлгән нәмә. *Өтөк еҫе.*

**ӨТӨКЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** *ҡар.* **өтәләнеү** [1].

**2.** *кусм.* Өтөккә [2] (2 *мәғ.*) әйләнеү. *Туҡмалған, өтөкләнгән ғәскәрен һипләү өсөн [Гитлер] Мәскәү эргәһенә яңы көстәр ҡыуаланы.* Д. Исламов.

**ӨТӨКӨШ** *с. диал. ҡар.* **өшәнес** 1. *Өтөкөш көн.*

**ӨТӨКҺӘ** *с. диал. ҡар.* **өтөк** [1].

**ӨТӨКӘБАШ** *и. диал.* Бәпембә.

**ӨТӨЛӨП-ҠЫРЫЛЫУ** *ҡ.* Ныҡ ашығыу. *Һуңлайым, тип, өтөлөп-ҡырыла.*

**ӨТӨЛӨҮ** [1] *к. төш. кар.* **өтөү** 1, 2. *Утка өтөлөү. Эҫегә өтөлөү.* ■ *Муйыл ыңғырашып, эҫегә өтөлөп, ярылып бөткән ирендәрен ап-ак теле менән яланы.* Һ. Дәүләтшина. *[Погондың] сит-ситтәре калған Берлин янған сакта утта көйөп, өтөлөп.* Ғ. Әмири.

**ӨТӨЛӨҮ** [2] *к. диал. кар.* **өтәләнеү** [1]. *[Болоттар], кайҙа еләһегеҙ өтөлөп.* М. Илбаев. *Ағалары, бер ни тапмай, өтөлөп кайтып килә икән, ти. Таҙҙың байып кайтып килгәнен күргәс, бик көнләшкеләр, ти.* (Әкиәттән).

**ӨТӨР** *и.* Койроклo нөктә рәүешендәге тыныш билдәһе (,). *Өтөр куйыу.*

**ӨТӨРГӨ** *и. диал.* Касау. *Ағас өтөргөһө. Таш өтөргөһө.* ■ *Рәсих .. беҙ кергәндә мастерскойында корос өтөргө менән саткылар сығарып, таш юнып тора ине.* Р. Ғабдрахманов.

**ӨТӨП-КЫРЫУ** *к.* Нык ашыктырыу. *[Тимергәле:] Ашығыу ул шайтан эше. Улай өтөп-кырып, һөрләктөрөп йығайым тигән уй менән килмәнем.* Һ. Дәүләтшина.

**ӨТӨҮ** *к.* **1.** Утка тотоп, йөндән таҙартыу. *Баш-тоякты өтөү.* ■ *[Рәхимә:] Мәғфүрә килен, тәкәләрҙең башын, түштәрен үҙең өт инде.* Һ. Дәүләтшина. / Утка тотоп яндырыу (сәс, йөн кеүек нәмәне). *Урал батыр .. өс бөртөк кылды алып өткәйне, Акбуҙат тып итеп каршыһына килеп баҫты, ти.* «Урал батыр». / Утка, куҙға тотоп бешереү. *[Карт:] Быны хәҙер куҙға һалып, балығыңды өт инде.* С. Кулибай.

**2.** *күсм.* Нык эсеттереп, яндырыу. *Кыҙыл борос һабағы өтөп алғас тамағын, тыйнакланды бит Әпәс.* Ә. Вахитова.

**3.** Нык өшөтөү йәки тын алғыһыҙ эҫе булыу. *Эсе ел өтөп ала колак, кулдарҙы.* С. Ғәбиҙуллин. *Калала көндәр һаман тынды кырып, тәнде өтөп алып барҙы, эҫе, кайнар булды.* С. Агиш.

♦ **Йөрәкте** (*йәки* **йәнде**) **өтөү** бик нык әрнетеү, әсендереү. *Был һүҙ уның йөрәген өтөп алды.* «Ағиҙел», 1963, № 6. *Хәсрәт йәнде өттө, ағыуындай кара йыландың.* С. Кулибай. **Өтөп алып барыу** 1) тын алдырмай кыҫыу, ирек бирмәү.— *Бер туктауһыҙ буржуйҙарҙы өтөп алып барабыҙ.* Һ. Дәүләтшина. *Береһенән береһе яһил бит әй тегеләр. Миңә тештәре үтмәй үтеүен, ә катынды өтөп кенә алып баралар.* Ә. Гәрәев; 2) тынғы бирмәй ашыктырыу, кыҫмакка алыу. *[Кейемдә] вакытында өлгөртмәһәләр, өтөп алып барам тегеләрҙе.* З. Хисмәтуллин. **Өтөп ашап барыу** тынғы бирмәй бәйләнеү, кыйырһытыу. *[Ныязғол:] Айбулаттар беҙҙе өтөп ашап барғанда ла .. котолоу юлын тапканмын.* Һ. Дәүләтшина. **Өтөп ашамаҫтар** бер ни эшләтә алмаҫтар, курка торғаны юк, тигәндә белдерә. *[Шатморат:] Һин борсолма, Карлуғас, өтөп ашамаҫтар.* Б. Бикбай.

**ӨТӨШӨҮ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **өтөү** 1.

**ӨТРӘЙЕҮ** *к.* **1.** Асыуланып, һырт кабартыу (йәнлектәргә карата). *Бесәй өтрәйеп, эт каршыһында тора.*

**2.** *кар.* **әзрәйеү**.— *Бик кырыҫ егет икәнһең һин, әй. Һәр вакыт өтрәйеп йөрөйһөң.* Й. Солтанов.

**ӨТРӘЙЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **өтрәйеү**.

**ӨТРӘЙТЕҮ** *к.* **1.** Асыуландырып һырт кабарттырыу (йәнлектәргә карата).

**2.** *кар.* **әзрәйтеү**.

**3.** *диал.* Өлтәйтеү.

**ӨТТӨРӨҮ** *к. йөкм. кар.* **өтөү** 1, 2.

**ӨТӘКӘС** *и. диал.* Иң аҙактан сыккан бәпкә; оя төбө. *Өтәкәс — була бәләкәс.*

**ӨТӘЛӘК** *с. диал. кар.* **өтәлән** 1. *[Тутыя:] Һин улай бик өтәләк булма инде, Кәмәретдин, көткән тиклем көтөргә тура килмәҫ.* М. Хәйҙәров.

**ӨТӘЛӘН** *с.* **1.** Ашығып, кабаланып барыусан; кабалан холоклo. *Өтәлән кеше.*

**2.** Ашығыс, тиҙ башкарылырға тейешле. *Өтәлән эш.*

**ӨТӘЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Тиҙ-тиҙ эшләргә тырыштырыу; ашыктырыу, кабаландырыу. *Өтәләндереп, эшкә кыуыу.* ■ *Ә Малбай һаман, көмөш миҙалын шылтыратып, кешеләрҙе өтәләндереп йөрөй, кыҙыулата.* Б. Бикбай.

**ӨТӘЛӘНЕҮ** [1] *к.* Еңел куҙғалып, тиҙ эшләргә тырышыу; ашығыу, кабаланыу. *[Әсәһе — Фәрзәнәгә:] Кайҙа өтәләнәһең? Әҙерәк ял итеп алғас та өлгөрөрһөң әле.* Н. Мусин. *[Йәнбирҙе] кайҙалыр өтәләнә. Кайһылай йылмаяк! Күҙ ҙә эйәрмәй кәһәреңә.* В. Нафиков.

**ӨТӘЛӘНЕҮ** [2] *к. диал. кар.* **өлтөрәү** [1]. *Өтәләнеп йөрөү. Өтәләнеп тороу.* ■ *Йәйләүҙән ялтлап Сәлимә кайтып етте. Гөлйөҙөм уны өтәләнеп каршы алды.* Ф. Иҫәнғолов.

**ӨТӘЛӘҮ** [1] *к.* **1.** Йонсоп, йөнө койолоу (кош-корткa карата).— *Мин хәҙер Арҫланбай түгел, өтәләп бөткән .. куян.* Ә. Атнабаев. *Йәшлек дуҫым окшап калған өтәләгән тауыкка, нисек итеп оялмай ул күренергә халыкка.* Т. Арслан.

**2.** Аламаға әйләнеү, туҙып йыртылыу. *Ул [Шәмси] мамығы сығып, өтәләп бөткән юрғанды баш ашаһынан ябынһа ла, ауыр уйҙарынан котола алманы.* Ғ. Хәйри.— *Кайтайык, асыктырҙы,— тине Шәрифулла ямау һалыр ере калмай өтәләп бөткән төҫһөҙ киндер күлдәк-ыштан кейгән иптәшенә йонсоу күҙҙәре менән карап.* Ф. Иҫәнғолов. / *күсм.* Меҫкен хәлгә калыу; йолкошланыу. **Өтәләгән тауык** (*йәки* **әтәс**) әрләгәндә, хурлағанда әйтелә. *[Бойкий:] Өтәләгән әтәс, ниндәй оҫта итеп алдай.* Б. Бикбай.

**ӨТӘЛӘҮ** [2] *к.* Тиҙерәк куҙғалырға өндәү; ашыктырыу. *[Староста:] Ниңә өтәләйһең? Нимә булған?* Я. Хамматов.

**ӨТӘЛӘҮ** [3] *с. диал. кар.* **өтәлән** 1. — *Һин, өтәләү, бик шәп атлап, Нәфисә апайҙы арытма, карап кына алып кайт.* Н. Мусин.

**ӨТӘНЛӘҮ** *к.* Тиҙерәк булырға, куҙғалырға тырышыу. *Әбей өтәнләп китеп бара.*

**ӨТӘНЛӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **өтәнләү**. *Әбейҙәр шулай өтәнләшеп өйгә етеп барғанда, Котлояр каршы килеп сыкты.* Һ. Дәүләтшина.

**ӨТӘҪЛӘҮ** *к.* **1.** Утка тотоп, көйҙөрөү (йөн-мамыкты). *Аламаны өтәҫләп, Емешкә еҫкәттеләр.* З. Биишева. / Утка, куҙға тотоп бешереү. *Малайҙар .. каптырған балыктарын өтәҫләргә тотона.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Эҫегә һалып, кыҙҙырыу (кейем-һалымды). *[Гәрәй] бер кат кейемен кыҙыу ташка һалып, өтәҫләне.* Б. Бикбай.

3. *кусм.* Нык итеп әрләү; тетеү. *Кәримә ирен көтә-көтә, арып бөттө.. Башына төрлө уйҙар килде.. Ахыры, ярай, кайткас өтәсләрмен әле уйһыҙҙы тип, үҙен тынысландырҙы.* Я. Вәлиев.

**ӨФ** *окш.* Берәр нәмәгә өргәндә барлыкка килгән тауышты белдергән һүҙ. *Өф итеү.* ■ *Кабынһын донъя, бер өрһәм, өф тип. Табынһын миңә аждаһа, гифрит!* Ш. Бабич. *Әбей мунсаның мейесе янына килде лә «Өф!» тип бер генә өргәйне, мунса шунда ук түҙә алмаслык эсе парлы булып китте, ти* (Әкиәттән).

□ **Өф булыу** ауыртыу (бала телендә). *[Бала] әле итәгеңә йәбешеп, әле муйыныңа һарылып йөҙәтә, өф булган тип, һис ауыртмаганга өрҙөрөп китә.* С. Агиш. **Өф итеү** 1) ауырткан ергә өрөү (бала телендә); 2) якшы карау, кәҙерләү. *Өф итеп үстерә генә башлагайнык, колонкайыбыҙ, .. яткан да үлгән.* Ш. Насыров.

♦ **Өф итеп тороу** кәҙер-хөрмәт күрһәтеү. *[Килен] акыллы бала булып сыкты .. Котлобикә әбейҙе өф итеп кенә тора.* К. Мәргән.

● *Өф иткәнсе калһаң, уф иткәнсе кыуырһың.* Мәкәл.

**ӨФӨЛДӘТЕҮ** *к.* Өф итеп тороу, кәҙер-хөрмәт күрһәтеү. *[Айбулат:] Шулай инде ул минең әсәй .. Үҙе әйтмешләй, өфөлдәтеп кенә йөрөтә, өрмәгән ергә ултыртмай.* Ғ. Ибраһимов.

**ӨФӨЛДӘҮ** *к.* Өф-өф итеү, өф тә өф кнлеү; кабат-кабат өф итеү. *Түрбаш якта килене Бибеш бышылдап яткан сей усак яркаларын тоkандыра алмай, өфөлдәп өрөп маташа.* З. Биишева.

**Өф-Өф, өф тә өф** *окш.* Кабат-кабат өф иткән тауышты белдергән һүҙ. *Өф-өф итеү. Өф-өф килеү.*

**ӨҺӘН:** **өһән бушау** *диал.* асығыу.

**ӨШКӨРӨМ** *и.* Өшкөрөп имләү сараһы. *Бер өшкөрөм тоҙ. Кара әсбегә өшкөрөм килешә.*

**ӨШКӨРӨМ-ТӨКӨРӨМ** *и. йыйн.* Һәр төрлө им. *Өшкөрөм-төкөрөм менән дауалау.*

**ӨШКӨРӨНӨҮ** *к.* Үҙ алдына ниҙер укынып, өшкөрөү. *Өшкөрөнөп ултырыу.* ■ Фокус *күрһәтеүсе әллә нимәләр укынган кеүек итеп өшкөрөндө, төкөрөндө, йөҙөктө кулына алды. Еңенән ак манжетын күрһәтеп, һелкеп куйҙы.* С. Агиш.

**ӨШКӨРӨП-ТӨКӨРӨҮ** *к.* Төрлөсә им-том итеү. *Муллалар өшкөрөп-төкөрөп, дауалаган булып, Ирмокандың һарык-кәзәһен берәм-берәм алып китә башланы.* И. Көсәпкол.

**ӨШКӨРӨҮ** *к.* **1.** Доға укый-укый, өрөп имләү (ауырыған кешенең үҙен йәки дауа-дарман иткән берәй нәмәне). *Тоҙ өшкөрөп эсереү.* ■ *Шаһим мулла: «Ярай, улай булгас, өшкөрәйем. Иншалла, сихәте булыр»,— тип ниҙер укынып, минең йөҙгә өрә башланы.* К. Даян. *Күрәҙә Ғәйзулланың башы осона өшкөрөп балта, аяк осона бысак һалды.* Я. Хамматов.

**2.** *кусм. һөйл.* Урлау, сәлдереү.

**ӨШКӨРӨҮСЕ** *и.* Өшкөрөү менән шөғөлләнеүсе. *Өшкөрөүселәр, бик ҙур эш бөтөрөп, .. еңеп кайткан гәскәр кеүек, тәһәрәт яңыртабыҙ тип, ишек алдына таралды.* М. Ғафури.

**ӨШКӨРТӨҮ** *к. йөкм. кар.* **өшкөрөү 1.** *Өшкөртөп эсеү. Тоҙ өшкөртөү.* ■ *[Хәсби әбей — Гөльямалга:] Сәләй мулланың тыны бик килешә тиҙәр, өшкөртөп карарга кәрәк.* А. Карнай.

**ӨШКӨТӨҮ** *к.* Кош-корт, балык һ. б. йән эйәләрен куркытып кыуыу. *Балык өшкөтөү.* ■ *Һандугас кисә мин өшкөткән урында һайрай.* Ф. Бикбов.

**ӨШКӨҮ**[1] *к.* Капыл куркып касыу (кош-корт, балык, вак-төйәк йән эйәһенә карата).

**ӨШКӨҮ**[2] *к.* Өш-өш тип атты кыуып алыу; өшкәүелләү. *Һөйөнөс менән Зәлифәнең ашыкканын һиҙгән [атсы] атын өшкөнө лә, артына әйләнеп караны.* Ғ. Дәүләтшин.

**ӨШКӘБӘ** *с. диал.* Өшөмтәл. *[Ғәйзулла:] Эй, өшкәбә. Әллә өшөп тора инде.* Я. Хамматов.

**ӨШКӘМӘ** *и.* Араны боҙоу өсөн астыртын йөрөтөлгән һүҙ; отко. *Өшкәмә таратыу. // Өшкәмә һүҙ.*

**ӨШКӘМӘЛӘҮ** *к.* Өшкәмә таратыу. *Айырылмас дусыңдан айырырга теләгән дошманың өшкәмәләп төрлөһөн кылыр.* Ғ. Хөсәйенов.

**ӨШКӘМӘСЕ** *и.* Өшкәмә таратыусы.— *Старшинаның өшкәмәселәре, әйәрсендәре беҙҙе актык еребеҙҙән яҙҙырҙы.* Т. Хәйбуллин.

**ӨШКӘҮЕЛЛӘҮ** *к.* Өш-өш итеп, атты йышлап кыуыу. *[Мөлөк агай] ялангас кулына тоткан дилбегәһе менән атын тарткылай-тарткылай, өшкәүелләп бара.* Т. Хәйбуллин.

**ӨШӨКСӘН** *с. диал.* Өшөмтәл. *Өшөксән кеше. Өшөксән мал.*

**ӨШӨКҺӨНӨҮ** *к.* Бер аҙ һалкынлык тойоу, өшөгән һымак булыу. *Өшөкһөнөп тороу.*

**ӨШӨКҺӨҮ** *к.* Бер аҙ өшөү. *Өшөкһөп торган Акбәкәл, йә инде, тиҙерәк тигәндәй, башын сайкап, ауыҙлыгын сәйнәй ине.* С. Кулибай.

**ӨШӨЛӨҮ** *к. эйһ. ф. кар.* **өшөү 1.** *Нык өшөлгән.*

**ӨШӨМТӘЛ** *с.* Әҙ генә һыуыкка ла өшөп барыусан, тиҙ генә өшөп барыусан. *Өшөмтәл кеше. Өшөмтәл мал.*

**ӨШӨМҺӘК** *с. диал.* Өшөмтәл. *Бына хәҙер Люсяның кейенгәнен көтөргә кәрәк. Тегеһен кейә, быныһын урай .. Бигерәк өшөмһәк инде.* Р. Низамов.

**ӨШӨНӨҮ** *к. кайт. кар.* **өшөү 1.** *Ниңәлер өшөнөп торам әле.*

**ӨШӨРГӘНЕҮ** *к.* Бер аҙ өшөү. *Мин өшөргәнеп уянып киттем .. Сыуал уты күптән һүрелгән, өй һыуынган ине.* С. Кулибай.

**ӨШӨТКӨС:** **йән өшөткөс** күңел тетрәткес; ауыр, куркыныс. *Йән өшөткөс вакига.* ■ *Май аҙагы еткәс, йән өшөткөс хәбәр килде: «Көтөп каңгырма...»* Р. Сафин.

**ӨШӨТӨҮ** *к.* **1.** Өшөргә сәбәп биреү, өшөргә юл куйыу. *Колондо өшөтмәс өсөн бабай менән әбей уга көпө тегә һалып кейҙерә* (Әкиәттән).

**2.** Һыуыкта туңдырып, боҙоу. *Картуфты өшөтөү.*

**3** *кусм.* Ытырғаныс, куркыныс хистән калтыратыу. *Ауыр хәбәр йөрәгемде өшөттө.*

**4.** *эйһ. ф. кар.* **өшөү 1.** *Аҙ гына өшөтә. Минең өскә Буранбай шинелен яба.* Д. Юлтый.

**ӨШӨТТӨРӨҮ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **өшөтөү.**

**2.** *эйһ. ф. кар.* **өшөү 1.** *Әллә ниңә өшөттөрә. Нык өшөттөргән.*

**ӨШӨҮ** *к.* **1.** Һалҡынлыҡ тойоу; һалҡындан, һыуыҡтан яфаланыу. *Аяҡ өшөй. Өшөп ҡайтыу. Өшөп йөрөү. // Өшөү үтеп, ҡыҙҙыра башлағас, Емешкә тағы ла ауырыраҡ булды.* З. Биишева. *Ямғырҙа еүеш тимәгән, буранда өшөү белмәгән быңа тигән халҡым бар.* Р. Ниғмәти.

**2.** Һалҡындан, һыуыҡтан һәләк булыу (үҫемлеккә ҡарата). *Өшөгән алма.* ■ *Быйыл сейә, слива ағастарының бөрөләре һәм үткән йылғы үҫентеләре өшөнө.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 29 май. / Туңып, ҡатып боҙолоу. *Өшөгән картуфтан .. шәкәр тәме килеп тора.* К. Кинйәбулатова.

**3.** *күсм.* Ниндәйҙер аяныс хәлдән ҡурҡыу. *Быны [килгән бәләне] ишеткәс, Мәсем хан өшөп китте, башынан таҡыяһы төшөп китте* «Бабсаҡ менән Күсәк». **Йөрәк (йәки йән) өшөү** аяныс хәлдән ҡурҡып ҡалтырау; биҙрәү. *Баҙарҙа ваба менән ауырып, арбаларында ҡоҫоп ятҡан кешеләрҙе .. күргәс, уның [Сәмиҙең] йөрәге өшөп китте.* Д. Юлтый. *Башҡорт халҡының үҙған балаларҙа йөрәге өшөп, батырҙары аҫылып, һуйылып бөттө.* М. Буранғолов.

**ӨШ-ӨШ** *ҡыу.* Ат ҡыуғанда әйтелә торған һүҙ. *Өш-өш итеү. Өш-өш килеү. Өш-өш ҡыуыу.*

**ӨШӘ**[1] *и.* Ваҡ ҡына итеп бешерелгән сөсө икмәк. *[Әсәһе — Талипка:] Өшә бешереп тә һалыр инем, хатта бер сүгәтә оном юҡ.* Б. Вәлит. *Хан өшәне ашап бөткән дә егеттән: «Бик тәмле икән шул! Нимәнән бешерелгән һуң ул?» — тип һораған* (Әкиәттән). / Бәләкәй итеп йомарлаған ҡамыр. *Ике өшә һалма.*

**ӨШӘ**[2] *с. диал.* Өшөмтәл.

**ӨШӘКӘ**[1] *и. диал.* Күмәс.

**ӨШӘКӘ**[2] *с. диал.* Өшөмтәл.

**ӨШӘЛӘК** *и.* **1.** Ҡуян, ҡор, селдәрҙең ҡарҙы соҡорлап яһаған ояһы. *Ҡуян өшәләге.* ■ *Ҡуян тыныс өшәләген ташлап, әллә ҡайҙа сапты ашығып.* Р. Бикбаев. / Ҡуян тотоу өсөн төп яғын киң, ауыҙын тар итеп, ҡаҙып яһаған тәрән соҡор (төбөнә бесән һибеп ҡуялар, төшкән ҡуянды юрған ябып тоталар). *Өшәләккә ҡамалған ҡуяндар кеүек, .. блиндаждың төпкөлөнә инеп ултырҙыҡ.* Д. Юлтый.

**2.** Бәләкәй генә өй йәки ҡыуыш. *Ауыл кешеһе үҙенең барлы-юҡлы малын барлаған да ыжғыр елле һыуыҡтан .. ҡасып, бәләкәс кенә өшәләктәренә инеп, бөршәйеп, йоҡоға талған.* Ғ. Дәүләтшин.

**ӨШӘЛӘКЛӘҮ** *ҡ.* Өшәләк һымаҡ итеп соҡоу. *Эҫкертте өшәләкләп инеү.* ■ *Ҡәләмбай.. сәңгетеп, ялап алып барған саскау һыуыҡҡа [түҙмәй], яҡындағы бесән кәбәнен өшәләкләп, эсенә инеп ятты.* Т. Хәйбуллин.

**ӨШӘЛӘҮ**[1] *ҡ.* **1.** Йоҙроҡ ҙурлыҡ итеп йомарлау (ҡамыр, балсыҡ һымаҡ нәмәне).

**2.** *күсм.* Арлы-бирле итеп тиҙ генә эшләү; һупалау. *Өшәләй һалып бешереү.*

**ӨШӘЛӘҮ**[2] *ҡ. диал.* Өшкәүелләү. *Өшәләп ат ҡыуыу.*

**ӨШӘМӘ** *и.* Ҡарлы-ямғырлы, йонсоу, һыуыҡ көн. *Ике көн рәттән ямғыр яуҙы. Әхмәҙулла бабай, был өшәмәлә ҡайҙа бараһың, тип, киң һикегә менеп ултырҙы ла китап актарырға керешә.* Ә. Вахитов.

**ӨШӘН** *с. диал. ҡар.* **арыҡ**[2]. *Өшән ат.* ■ *Аҙыҡ яғы наҡыҫыраҡ булғайны, һыйырыбыҙ ҡыштан бик өшән сыҡты.* Ғ. Байбурин.

**ӨШӘНДЕРГЕС** *с.* Сирҡандырғыс, биҙрәткес (һалҡынға, һыуыҡҡа ҡарата]. *Өшәндергес көҙгө көн.* ■ *Ҡыш торған һайын үҙенең яҡынайыуын белдереп, өшәндергес тынын өрөүен арттыра төштө.* И. Ғиззәтуллин. *Көҙгө өшәндергес һыуҙа ла сирҡанмай ул [Абдулла] — гәҙәтләнеп бөткән.* Н. Мусин.

**ӨШӘНДЕРЕҮ** *к.* **1.** Сирҡандырып, ҡалтыратып, өшөтөү. *Ямғыр һаман туҡтамай, ҡулына автомат тотоп дежурҙа торған Сираевты өшәндереп, һибәләй ҙә һибәләй.* Н. Мусин. *Өшәндереп, епшек көндәр килһә, хис итәмен һине эргәмдә.* В. Әхмәҙиев.

**2.** Йонсотоу, ыҙалатыу. *[Бабай:] Оҙаҡ йөрөй, тағы өшәндерә инде атты.* Ә. Вахитов.— *Һөйлә, ҡайҙа йөрөнөң? Нишләп өшәндерҙең атыңды?* М. Тажи.

**ӨШӘНДӘК** *и. диал.* Өшәмә. *Көҙгө өшәндәк. // Өшәндәк көн.*

**ӨШӘНЕС** *с.* **1.** Һыуыҡ, сирҡаныс. *Өшәнес көн.* ■ *Урамда быҫраҡ, бер кем йөрөмәй. Тынлыҡ. Көндөң өшәнес булыуынан биҙеп, бөтә кеше иртә үк йоҡоға талған.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *күсм.* Күңелде биҙрәтеп, ҡыйын булып торған. *Өшәнес хәл. Өшәнес эш.*

**ӨШӘНЕҮ**[1] *к.* **1.** Сирҡанып, ҡалтырап өшөү. *Өҫтө нык һыулана башлағас, Луиза өшәнеп, яурындарын һикертеп ҡуйҙы.* Н. Мусин.

**2.** *күсм.* Ҡурҡыу. *Бынау буранда утынға барып килергә өшәнеп торам. Туҫтаҡтағы бойҙайҙы күргәс, ҡарсыҡ өшәнеп китте: «Ҡуй, балаҡайым, башың Себер китер»,— тине.* Х. Ғиләжев.

**ӨШӘНЕҮ**[2] *к. диал. ҡар.* **йонсоу**[1]. *Аттар бик үк өшәнмәгән булып сыҡты: сыбыртҡы тейҙермәй, һалмаҡ ҡына юрталар.* С. Агиш.

**ӨШӘНСЕК** *и. этн.* Ҡыҙҙарҙың кейәүгә сыҡҡанда алып барған кәрәк-яраҡ, түшәк-ҡаралдыһы. *Ул [Мәрфуға] үҙенең ошо талҡыһында бик күп киндер, етен талҡыған, өшәнсек һәм бирнә әҙерләгән ҡыҙҙары өсөн ҡулаҡ халҡының.* С. Ҡудаш.

# П

**П** [пэ] Башҡорт алфавитының егерме икенсе хәрефе.

**ПАВИА́Н** [*рус.* 〈*нем.*] *и.* Оҙон томшоҡло эре маймыл (башлыса Африкала һәм Ғәрәбстан ярымутрауында йәшәй).

**ПАВИЛЬО́Н** [*рус.* 〈*фр.*) *и.* Баҡсаларҙағы төрлө еңел, бәләкәй ҡоролма. *Сәскә павильоны.* ■ *Агас баҡсаһының бер яҡ ситендә, тыныс урында таҡта павильон бар. Унда библиотека урынлашҡан.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 14 июль. / Күргәҙмәнең экспонаттары ҡуйылған йорт. *Ауыл хужалығы павильоны.*

**ПАВЛИ́Н** [*рус.* 〈*лат.*] *и. ҡар.* **тауис.**

**ПАГОДА** [*рус.* ⟨*порт.*] *и.* Японияла, Ҡытайҙа һәм ҡайһы бер башҡа илдәрҙә будда динен тотоусыларҙың ғибәҙәт йорто.

**ПАДИШАҺ** [*фарс.*] *и. иҫк. кар.* **батша.** *[Мәхмутов:] Мин староста булып падишаһы әгзәм хәҙрәттәренә ун ике йыл көнө-төнө арымай--талмай хеҙмәт итәм.* С. Агиш.

**ПАЁК** [*рус.*] *и.* Билдәләнгән норма менән билдәле ваҡытҡа кемгәлер бирелә торған аҙыҡ. *Көнлөк паёк.* ■ *[Айбулат] паёкка тейгән ярты боттай кукуруз онон, бер әсмүхә сәйен, башка вак-төйәген төйнәне лә юлаусы менән Гөлйөҙөмгә оҙатты.* Һ. Дәүләтшина.

**ПАЙ** *и.* [*төрк.*] Дөйөм бер эштә ҡатнашлыҡ итеү өсөн индерелгән өлөш. *Пайға инеү.* ■ *[Гәрәй:] Ҡалаға күсеп, Әхмәров ағай менән пайға кереп, магазин асып ебәрергә иҫәбем бар.* Б. Бикбай. *Икмәк күберәк кәрәк булһа, пайға күберәк һалығыҙ.* Д. Юлтый.

**ПАЙДАР** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Ныҡ, даими.

**ПАЙСЫ** *и.* Пай индергән, өлөшкә ингән кеше. *Пайсылар алдында иҫәп биреү.*

**ПАЙТӘХЕТ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Баш ҡала. *Пайтәхетте — шанлы ҡаланы дошман яуы килеп камаған.* М. Кәрим.

**ПАК** [*фарс.*] *с.* **1.** Бысраҡ теймәгән, бысрамаған; таҙа. *Нурҙа, һыуҙа мин ҡойондом, күрмәнем пак өҫтәрем.* Д. Юлтый.

**2.** *күсм.* Боҙоҡ, насар теләктәр һәм эштәрҙән азат; рухи һәм әхлаҡи яҡтан таҙа. *Пак күңел. Намыҫы пак. Выжданы пак.* ■ *Пак дуҫтарға күңел сикһеҙ һәм уларға йөрәк бикһеҙ.* Ҡ. Даян.

**3.** *күсм.* Алдыҡҡа, ялғанға ҡатышһыҙ; дөрөҫ, юллы, хәләл. *Әй тәкәббер бай! Бар малыңдан купмеһе пак?.. Бир хәләленән хисап.* М. Ғафури.

● *Ҡулың аҡ булһа, йөҙөң пак.* Әйтем.

**ПАКГАУЗ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Тимер юл станцияларында, порттарҙа, таможняларҙа һ. б. шундай ерҙә йөктәрҙе ҡыҫҡа срокка һаҡлау складлы. *Бер көндө станция начальнигы депо һәм юл эшселәрен йыйҙыртты.. Буш торған пакгаузға ике йөҙләп эшсе йыйылды.* А. Таһиров.

**ПАКЕТ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Урап, төрөп ҡуйылған нәмә; төргәк. *Бинт пакетын асып, һыңар ҡул менән йәрәхәтте бәйләнем.* Д. Юлтый. / Ни ҙә булһа һалыу өсөн яһалған ҡағыҙ йәки полиэтилен тоҡсай. *Соданы пакетҡа тултырыу.*

**2.** Рәсми йөкмәткеле хат йәки ҡағыҙ һалынған конверт. *Мисәтле пакет.* ■ *Инеуселәрҙең береһе .. бәләкәй генә пакет бирҙе. Ғәлим тиҙ генә пакетты асып, уҡый башланы.* С. Ханов.

**ПАКИЗӘ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Бөхтә, таҙа (кейемгә ҡарата).

**ПАКЛАНЫУ** *к. иҫк.* **1.** Пакка әйләнеү, пак булыу; таҙарыу.

**2.** *күсм.* Аҡланыу. *Гөнаһынан йәне-тәне пакланһын тип, үгеҙҙе янған утҡа һалдылар.* М. Ғафури.

**ПАКЛАУ** *к.* **1.** Пак итеү; таҙартыу. *Көҙгө лә кәрәк нәмә. Көҙгөгә ҡарап, кеше өҫтөн-башын рәтләй, бит-күҙен паклай.* Й. Гәрәй.

**2.** *күсм.* Эске боҙоҡлоҡ, етешһеҙлектәрҙән арындырыу; ағартыу. *Күңелдәре бәләнд ирҙәр һәр кемде хурлауға бар, маҡтауға юҡ. Яҡын барһаң, тимерсе күрегендәй, ул һине керләүгә бар, паклауға юҡ.* Аҡмулла.

**ПАҠЛЫҠ** *и.* **1.** Бысраҡ теймәгән, бысрамаған хәл; таҙалыҡ. *Ай-һай ниндәй тынлыҡ, ай-һай гәжәп паклыҡ. Яңы йыл ҡыуаныр, һауаларҙа сафлыҡ.* К. Кинйәбулатова. *Бөтә инсан, мазлумдар донъяһы нурға сумған, аңҡый бер паклыҡ.* Д. Юлтый.

**2.** *күсм.* Рухи һәм әхлаҡи яҡтан таҙа хәл, боҙоҡ, насар теләк һәм эштәрҙән азат хәл; сафлыҡ. *Пак тыуып, выждан менән паклыкта үҫкән бәндә мин.* Ш. Бабич. *Кер төшөрмәй һаклар килер быуын, Ильич, уйҙарыңдың паклығын!* Н. Иҙелбай.

● *Паклыҡ һөйгән һау булыр.* Әйтем.

**ПАКТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Ҙур политик әһәмиәткә эйә булған халыҡ-ара договор. *Һөжүм итешмәү тураһында пакт.*

**ПАКУС** [*рус.* покос] *и. кар.* **ҡайырым** 1, 2.

**ПАЛАТА** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Больницала йәки башҡа дауаланыу йортонда ауырыуҙар ята торған бүлмә. *Ҡаты ауырыуҙар палатаһы. Палата сестраһы.*

**2.** Ҡайһы бер илдәрҙә һайлаулы органдар йәки уларҙың айырым өлөштәренең исеме. *Палата депутаттары. Халыҡ палатаһы. Палата ултырышы.* ■ *СССР Верховный Советы ике палатанан: Союз Советынан һәм Милләттәр Советынан тора.* СССР Конституцияһы, 1984.

**3.** Берәй эш алып барған ҡайһы бер дәүләт учреждениелары исеме. *Суд палатаһы. Китап палатаһы.*

**ПАЛАТКА** [*рус.*] *и.* **1.** *кар.* **сатыр** [1] 1.

**2.** Ваҡ-төйәк һата торған еңел ҡоролма. *Аҙыҡ-түлек палаткаһы.*

**ПАЛАЧ** [*рус.*] *и.* **1.** Үлем хөкөмөн башҡара, тән язаһы бирә торған кеше. *Якутов дар ағасына барып еткәс, палачты этеп ебәреп, һалҡын ултырғыска үҙе менеп баҫты.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 2 июль.

**2.** *кар.* **залим** 2.

**ПАЛЕОАЗИАТ** [*рус.* палеоазиатский]: **палеоазиат халыҡтар** сығышы һәм теле буйынса бер-беренән айырмаһы булған Төньяҡтағы бер нисә ваҡ халыҡтың (чукот, коряк, юкагир, нивх һ. б.) шартлы исеме. **Палеоазиат телдәр** палеоазиат халыҡтарҙың телдәре.

**ПАЛЕОГРАФ** [*рус.*] *и.* Палеография буйынса белгес, боронғо ҡулъяҙмалар менән шөғөлләнгән белгес.

**ПАЛЕОГРАФИК** *с.* Палеографияға мөнәсәбәтле. *Тексҡа палеографик анализ яһау.*

**ПАЛЕОГРАФИЯ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Яҙманың тарихын, уның яҙыу ысулын, шулай уҡ боронғо яҙма ҡомарткылар тыуҙырыу тарихын өйрәнә торған фән.

**ПАЛЕОЗОЙ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.*, **палеозой дәүере** Ерҙең геологик тарихында мезозой дәүеренән алда булған боронғо дәүер.

**ПАЛЕОЛИТ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и. археол.* Таш быуаттың иң боронғо осоро.

**ПАЛЕОНТОЛОГ** [*рус.*] *и.* Палеонтология буйынса белгес.

**ПАЛЕОНТОЛОГИК** *с.* Палеонтологияға мөнәсәбәтле. *Палеонтологик атлас.*

**ПАЛЕОНТОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Боронғо ҡаҙылдыҡ хайуан һәм үҫемлектәрҙе өйрәнә торған фән.

**ПАЛЕСТИН** *и.* Палестинаның ғәрәптәрҙән торған халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе.

**ПАЛИ́ТРА** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Баш бармаҡ һыйырлыҡ тишеге булып, һүрәт төшөргәндә буяуҙы алып-һалып тороу өсөн ҡулланылған йоҡа түңәрәк йәки дүрткел таҡта. *Акварель буяуҙары теҙелгән .. ҡатырға палитраны [малай] һул ҡулының баш бармағына кейҙереп алған.* С. Агиш.

**2.** Айырым һүрәттә, художниктың ижадында ҡулланылған буяуҙар ҡушылмаһы. / *күсм.* Композитор, яҙыусы, артист һ. б. ижадындағы төрлө тасуири сара. *Хәҡиҡәтте күрә белгән шағир әүәлге палитраһына яңы буяуҙар өҫтәй.* Ғ. Хөсәйенов.

**ПА́ЛТУС** [*рус.*] *и.* Камбалалар төркөмөнә ҡараған төньяҡ диңгеҙ балығы.

**ПА́ЛУБА** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Караптың буйҙан-буй йәйелгән иҙәне. *Аҫҡы палуба. Өҫкө палуба.* ■ *Пристандер, ахыры, пассажирҙар палубаға сығып баҫтылар.* Ғ. Сәләм.

**ПА́ЛЬМА** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Оҙон зифа олонло, иң осонда өлпөләнеп торған эре ҡауырһын япраҡлы мәңге йәшел көньяҡ ағасы. *Хөрмә пальмаһы.*

**ПАЛЬТО́** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Сабыуы ғәҙәттә тубыҡтан түбән булып, күлдәк, костюм һ. б. өҫтөнән кейә торған йылы кейем. *Йоҡа пальто. Ҡалын пальто.* ■ *[Гөлдәрҙең] өҫтөндә үҙенә үлсәп кенә тегелгән ҡара бәрхәт яғалы пальто.* К. Кинйәбулатова.

**ПАМФЛЕ́Т** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Йәмғиәт тормошондағы хәл-ваҡиғанан йәки айырым кешенән социаль-политик йәһәттән бик эсе көлөп яҙылған публицистик әҫәр.

**ПАМФЛЕТСЫ** *и.* Памфлет яҙыусы, памфлет авторы.

**ПАН** [*рус.* ⟨*пол.*] *и.* **1.** Иҫке Польшала, Литвала һәм революцияға тиклемге Украинала һәм Белоруссияла помещик, дворян.

**2.** Польшала, Чехословакияла, Литвала ир кешене ихтирам итеп өндәшеү һүҙе.

**ПАНА́МА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Киң тирәсле йәйге йоҡа баш кейеме.

**ПАНБӘРХӘТ** [*рус.* панбархат] *и.* Йоҡа ебәк бәрхәт. *Байыраҡ ҡатындар баштан-аяҡ панбәрхәткә төрөнөп йөрөй.* З. Хисмәтуллин.

**ПАНДЕМИ́Я** [*рус.* ⟨*гр.*] *и. мед.* Тотош өлкәне, илде йәки бер-нисә илде солғаған эпидемия.

**ПАНЕ́ЛЬ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* **1.** *махс.* Йыйылма төҙөлөштә ҡулланылған бетон йә ағас плита. *Йорттарҙы эре панелдәрҙән төҙөү.* // *Панель йорт.*

**2.** Эске стенаның көплөп йәки буяп ҡуйылған аҫҡы өлөшө. *Залдарҙы асыҡ төҫкә буяйҙар, уға панель яһарға ярамай.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1966, № 8.

**ПА́НИКА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Ғәҙәттә ҡапыл, күп кешенең иҫ, аҡылын алған ҡурҡыу тойғоһо. *Паникаға төшөү. Паника таратыу.* ■ *Был хәбәр һалдаттар араһында паника уятты, шаулаша башланылар.* Д. Юлтый. / Шул тойғонан ҡупҡан бола.

**ПАНИКЕ́Р** [*рус.*] *и.* Паникаға төшөп барыусан кеше.

**ПАНИСЛАМИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Ниғеҙендә бөтә донъя мосолмандары «берҙәмлеген» күҙ алдында тотоп, уларҙы бер дәүләткә берләштереүҙе маҡсат итеп ҡуйған дини-политик идеология.

**ПАНИСЛАМИ́СТ** [*рус.*] *и.* Панисламизм яҡлы кеше.

**ПАННО́** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Стена йәки түшәмдең һүрәт менән биҙәү өсөн уратып алынған өлөшө һәм өлөшкә төшөрөлгән һүрәт.

**ПАНОРА́МА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* **1.** Бейек ерҙән ҡарағанда йәйрәп ятҡан күренеш. *Уның [Рәмзиәнең] уйсан ҡарашы тәҙрәнән алыҫҡа, заводтарҙың мөһабәт панорамаһына йүнәлде.* Х. Зарипов.

**2.** Өҫтән яҡты төшкән түңәрәк бина стенаһына ҡуйылып, алғы планы ҙур күләмдә күренгән һүрәт. *Севастополь һуғышының панорамаһы.*

**3.** *хәрби* Тупты сәпкә төҙәү өсөн ҡулланылған оптик прибор.

● **Панорама фильмы** ярым түңәрәк йәки түңәрәк залда махсус экранда күрһәтәү өсөн бер үк ваҡытта өс пленкаға йәки төшөрөү аппаратын үҙ күсәре тирәләй әкренләп бороп төшөрөлгән фильм. **Панорама кинотеатры** панорама фильмы күрһәтеү өсөн яраҡлаштырылған кинотеатр.

**ПАНСИО́Н** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Сит илдә һәм революцияға тиклемге Россияла тулы тәьминәтле ябыҡ уҡыу йорто. *Пансион уҡыусыһы.* / Революцияға тиклемге Россияның ҡайһы бер урта уҡыу йорттарындағы тулаәүле ятаҡ.

**ПАНСИОНА́Т** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Ҡайһы бер уҡыу йорттарында, курорттарҙа һ. б. йәшәгәндәргә булдырылған тулы тәьминәт. *Бында [Нөгөш янында] бик күп пансионат, ял йорто, туристик база һәм пионер лагеры асыла.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 25 август.

**2.** Ял итеүселәр өсөн булған ҡунаҡ йорто төрө.

**ПАНТ** [*рус.* панты ⟨*нан.*] *и.* Йәш болан, марал, изюбрҙың ҡатып етмәгән мөгөҙө (дарыу әҙерләүгә ҡулланыла).

**ПАНТАЛОН** [*рус.* панталоны ⟨*ит.*] *и.* Ҡатынҡыҙҙың эске ҡыҫҡа ыштаны.

**ПАНТЕИ́ЗМ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Алланы тәбиғәткә тиң ҡуйып, тәбиғәтте алланың кәүҙәләнеше тип иҫәпләгән дини һәм философик тәғлимәт.

**ПАНТЕИ́СТ** [*рус.*] *и.* Пантеизм яҡлы кеше.

**ПАНТЕИСТИК** *с.* Пантеизмға һәм пантеисҡа мөнәсәбәтле. *Пантеистик ҡараш.*

**ПАНТЕО́Н** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* **1.** Боронғо грек һәм римляндарҙа: бөтә аллаларға бағышланған ғибәҙәтхана.

**2.** Иң күренекле кешеләр ерләнә торған урын.

**ПАНТОКРИ́Н** [*рус.*] *и.* Панттан әҙерләнгән дарыу (хәл индереү өсөн ҡулланыла).

**ПАНТОМИ́МА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Тойғо, фекерҙе ым, мимика менән бирә торған театраль тамаша.

**ПАНТЮРКИ́ЗМ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* 20 быуат баштарында барлыҡҡа килеп, төрки телдәрҙә һөйләшкән халыҡтарҙы Төркиә бойондороғо аҫтында бер дәүләткә берләштереү маҡсатын ҡуйған доктрина.

**ПАНТЮРКИ́СТ** [*рус.*] *и.* Пантюркизм яклы кеше.

**ПАНЦИРЛЫ** *с.* **1.** Бер-беренә инеп тормалы тимер дүңгәләктәрҙән торған. *Панцирлы кағауат.*

**2.** Панцирь (2 мәғ.) менән көпләнгән. *Панцирлы балыктар. Панцирлы кеҫәрткеләр.*

**ПА́НЦИРЬ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Бер-беренә инеп тормалы тимер дүңгәләктәрҙән эшләнгән хәрби күлдәк (борон яугирҙе һөңгө, ҡылыс кеүектең яраһынан һаҡлаған).

**2.** Ҡайһы бер йәнлектәрҙең тышҡы ҡаты ҡабығы; ҡабырсаҡ. *Гөбөргәйелдең панцирыы.*

**ПА́ПА** [*рус.* ⟨ *лат.* ⟨ *гр.*] *и.* Рим католик сиркәүенең иң ҙур башлығы. *Рим папаһы.*

**ПАПА́ХА** [*рус.* ⟨ *төрки*] *и.* Йәнлек тиреһенән бейек итеп тегелгән ҡолаҡһыҙ бүрек. *Генерал папахаһы.* ■ *Захаровтың башында ҡыҙыл түбәле ҙур ҡара папаха.* Б. Хәсән.

**ПАПИРО́С** [*рус.* папироса ⟨ *пол.*] *и.* Бер яҡ осона тәмәке тултырып, тартыу өсөн йәтешләп яһалған ҡағыҙ гильза. *Бер ҡап папирос.* ■ [*Талха*] *киммәтле папиростар, сит ил сигаретары ғына көйрәтә.* В. Исхаков.

**ПАПИ́РУС** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* **1.** Ҡамыш һымаҡ тропик үҫемлек.

**2.** Шул үҫемлектән египеттар һәм башҡа боронғо халыҡтар яһаған яҙыу материалы. *Папируска яҙыу.* / Шул материалға яҙылған боронғо ҡульяҙма. *Папирусты уҡыу.*

**ПА́ПКА** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Ҡағыҙ һалыу өсөн ҡатырға, күн һ. б. нәмәнән эшләнгән тыш. *Шәмсиҙең ҡулына һары тышлы бер папка эләкте. Уны .. асҡанда эсенән ваҡ ҡағыҙҙар таралып иҙәнгә төштө.* Ғ. Хәйри.

**ПАПУА́С** *и.* Яңы Гвинеяның һәм уға яҡын утрауҙарҙың төп халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе. *Папуас телдәре.*

**ПАР** [1] [*рус.*] *и.* **1.** Юғары температура тәьҫирендә һыуҙан әүерелгән газ; боҫ. *Һыу парҙары. Парға әйләнеү.* / Машина көсө йәки йылылыҡ сығанағы итеп файҙаланыла торған шундай газ. *Пар машинаһы. Пар тирмәне. Пар ҡаҙаны.*

**2.** *һөйл.* Ныҡ эҫетелгән дымлы һауа. [*Ғәлимә:*] *Гәрәй ҡайнағама мунса килешкән! Беҙҙең мунсаның пары шулай йомшаҡ ул.* Б. Бикбай.

**ПАР** [2] [*рус.* пара ⟨*нем.*] *и.* **1.** Икеһе бер бөтөн тәшкил иткән ишле нәмә. *Бер пар итек. Ике пар ойоҡ.* ■ *Йылғаларға бара, һыуҙар ала, пар күнәкәйҙәрен тултырып* (Халыҡ йырынан).

**2.** Бергә йөрөгән, бергә ҡулланылған ишле ике нәмә. *Алты пар сынаяҡ. Бер пар костюм.* / Шул ике иштең береһе (икенсеһенә ҡарата). *Сынаяҡтың пары.*

**3.** Яҡын мөнәсәбәт йәки тойғо менән бәйле ике зат. *Пар күгәрсен. Алты пар ҡунаҡ.* / Шул икәүҙең береһе (икенсеһенә ҡарата). *Үҙеңә пар табыу.* ■ *Парҙарын эйәртеп Яҡуп, Фәхри, Харис, Ғамирҙар килеп инде.* Б. Бикбай.

♦ **Пар ат** ҡушлап егелгән ике ат. *Пар ат еккән бер ылаусы килеп сыҡты, ти* (Әкиәттән). **Пар килеү** тиң булып, тап килеү. *Ҡазанда юҡ, Мәскәүҙә юҡ һеҙҙең кеүек пар килгән* (Халыҡ йырынан).

**ПАР** [3] [*рус.*] *и.* Ужым ашлығы сәсеү өсөн алдан һөрөп ҡуйылған ер. *Парға һөрөү. Пар ере.* **Ҡара пар** ныҡ эшкәртелгән таҙа пар. **Сәсеүле пар** ужым ашлығына тиклем бүтән нәмә сәселгән пар. **Таҙа пар** һөрөп, йәйгелеккә сәсмәй ҡалдырылған пар.

**ПАРА** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Киҫәк, өлөш. *Милләткә бер пара бирмәҫ, маҡсудын алмаҡ улар.* С. Яҡшығолов.

♦ **Йөрәк** (*йәки* **бәғер**) **параһы** иркәләткәндә, яратҡанда әйтелә. *Күҙемдең нуры, бәғерем параһы, эй, өмөтөм, бала, һабаҡ уҡығыл.* М. Өмөтбаев.

**ПАРАБЕ́ЛЛУМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Автоматик пистолеттың бер төрө.

**ПАРА́ГРАФ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Тексттың айырым мәсьәләгә арналған бәләкәй бер өлөшө (§ билдәһе аша номерлап бирелә). *Дәреслектең беренсе параграфы.*

**2.** § тамғаһы үҙе.

**ПАРА́Д** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Берәй тантана уңайы менән ғәскәрҙең тантаналы үтеүе. *Ғәскәр парады. Хәрби парад. Парад кейеме.* / Уҡыусыларҙың, пионерҙарҙың һ. б. тантаналы йөрөшө. *Физкультурниктар парады.*

**ПАРАДИ́ГМА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. грам.* Үҙгәрә торған һүҙҙең, конструкцияның килеш, зат, заман менән үҙгәреү өлгөһөнөң системаһы.

**ПАРАДО́КС** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Ғәҙәттәге төшөнсәгә ҡаршы килгән, тура килмәгән уй, фекер. *Чукотка һәм .. һарыҡ. Бынан да ҡыҙыҡ парадоксты башҡа килтереп булмай. Ләкин поляр түңрәктән алыҫ түгел Эгвекинот электр станцияһының ярҙамсы хужалығында ысынлап та һарыҡ аҫрала.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 22 октябрь.

**ПАРАДОКСАЛЬ** [*рус.* парадоксальный] *с.* Парадокс һаналған; ғәҙәттән тыш, ғәжәп. *Парадоксаль хәл.*

**ПАРАЗИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *биол.* Башҡа организмдарҙың өҫтөндә, тәнендә йәки эсендә йәшәп, ғәҙәттә зыян килтереп, уның иҫәбенә туҡланған үҫемлек йәки йән эйәһе. *Паразит булып йәшәү. // Паразит бәшмәктәр. Паразит бөжәктәр.*

**2.** Башҡалар иҫәбенә йәшәгән кеше. *Фокараны паразит түрәләрҙән ҡотҡарыу беҙҙең мәрҡәҙдең бурысы.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**ПАРАЗИТИ́ЗМ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* **1.** *биол.* Төрлө төргә ҡараған ике организм араһында береһе (паразит) икенсе организмды йәшәү мөхите һәм туҡланыу сығанағы итеп файҙаланыуға ҡоролған мөнәсәбәт формаһы.

**2.** Кеше көсөнән файҙаланыуға ҡоролған тормош.

**ПАРАЗИТЛЫҠ** *и. ҡар.* **паразитизм.**

**ПАРАЗИТО́ЛОГ** [*рус.* ⟨*гр.*) *и.* Паразитология буйынса белгес.

**ПАРАЗИТОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Паразиттар (1 мәғ.) һәм паразитизм (1 мәғ.) тураһындағы фән.

**ПАРАЛАУ** *ҡ. иҫк. кит.* Ватыу. *Әсәйегеҙгә бирелмеш күҙгенө параламышһыҙ.* Ә. Иҫәнбирҙин.

**ПАРАЛИ́Ч** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тән ағзаларын хәрәкәтһеҙлеккә килтергән ауырыу. *Паралич һуғыу. Паралич һуҡҡан кеше.*

**ПАРАЛЛЕЛЕПИ́ПЕД** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мат.* Нигеҙе булып параллелограмдар хеҙмәт иткән алты ҡыр.

**ПАРАЛЛЕЛИ́ЗМ** [*рус.*] *и. ҡар.* **параллеллек.**

**ПАРАЛЛЕЛЛЕК** *и.* **1.** *мат.* Һыҙыҡ һәм яҫылыҡтарҙың бер-береһенән буйҙан-буйға тигеҙ алыҫлыҡта ятышы. *Яҫылыҡтарҙың параллеллеге.*

**2.** Ике нәмәнең тотош тап килеше, ҡабатланышы. *Эштәге параллеллек.*

**ПАРАЛЛЕЛОГРА́ММ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мат.* Ҡара-ҡаршы яҡтары үҙара тигеҙ һәм параллель булған дүртмөйөш.

**ПАРАЛЛЕ́ЛЬ** [1] [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *мат.* Икенсе бер һыҙыҡ йәки яҫылыҡтан буйҙан-буйға тигеҙ алыҫлыҡта ятҡан һыҙыҡ. *Параллель үткәреү.*

**2.** *геогр.* Экваторҙан тигеҙ алыҫлыҡта ер шарын уратып алған фарази һыҙыҡ.

**3.** Башҡа бер нәмәгә оҡшашлығы булған хәл, күренеш. *Тормоштағы параллелдәр.*

**ПАРАЛЛЕЛЬ** [2] [*рус.* параллельный] *с.* **1.** *мат.* Икенсе бер һыҙыҡ йәки яҫылыҡтан буйҙан-буйға тигеҙ алыҫлыҡтағы. *Параллель һыҙыҡ. Параллель яҫылыҡ.*

**2.** Бер йүнәлештә эргәләш ятҡан. *Параллель урамдар.*

**3.** Эше, рәүеше менән тап килешле. *Параллель кластар.*

**4.** Бер үк ваҡытта башҡарылған. *Параллель эш.*

**ПАРАЛОГИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Алдан уйламайынса килеп сыҡҡан логик хата; *кирәһе* софизм.

**ПАРА́МЕТР** [*рус.*<*гр.*] *и.* **1.** Математик формулаға инеп, билдәле бер мәсьәлә эсендә генә үҙенең даими мәғәнәһен һаҡлаған дәүмәл.

**2.** *физ., тех.* Берәй нәмәнең, күренештең төп сифаттарын ҡылыҡһырлаған дәүмәл. *«Венера-4» станцияһы Сулпан атмосфераһының параметрҙарын үлсәне.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 6 октябрь.

**ПАРАПСИХО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Парапсихология менән шөғөлләнгән кеше.

**ПАРАПСИХОЛО́ГИЯ** [*рус.*] *и.* **1.** Кешенең ғәҙәттән тыш, үтә тойоп белеүе, фекерҙе һәм тойғоно алыҫҡа бирә алыу үҙенсәлектәре тураһындағы тикшеренеүҙәр өлкәһе.

**2.** Кешенең фекерҙе һәм тойоуҙы алыҫҡа бирә алыу сифаттары.

**ПАРАТИ́Ф** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тифҡа оҡшаш йоғошло ауырыу.

**ПАРАФИ́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Нефттән һәм торфты, көрән күмерҙе ҡоролай ҡыуыуҙан барлыҡҡа килгән продукттан алынған балауыҙ кеүек аҡ йәки һарғылт матдә.

**ПАРАФИНЛАНЫУ** *ҡ.* Парафин менән ҡапланыу, парафин һеңеү. *Парафинланган сыр.*

**ПАРАФИНЛАУ** *ҡ.* Парафин менән ҡаплау, парафин һеңдереү. *Сырҙы парафинлау.*

**ПАРАШЮ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Осоу аппаратынан кешене, йөктө ергә төшөрөү, космик карапты һ. б. ергә ултыртыу өсөн ҡулланылған һауала асылмалы туҡыма көмбәҙ рәүешендәге ҡулайлама. *Парашют бауҙары. Парашют станцияһы. Парашют менән ергә һикереү.*

**ПАРАШЮТИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Парашют менән һикереүҙең теорияһы һәм практикаһы; парашют спорты.

**ПАРАШЮТИ́СТ** [*рус.*] *и. ҡар.* **парашютсы.**

**ПАРАШЮТСЫ** *и.* Парашютизм менән шөғөлләнә, парашют менән һикерә торған кеше. *Парашютсылар десанты.*

**ПАРИ́К** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Туҡыма ерлеккә тегелеп, башҡа кейә торған яһалма сәс. *Парик кейеү.* ■ *[Ҡәҙерғолдоң] башында бумала кеүек парик.* А. Таһиров.

**ПАРИКМА́ХЕР** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Сәс, һаҡал алыу, буяу һәм тарау оҫтаһы.

**ПАРИКМАХЕРСКИ́Й** [*рус.* парикмахерская] *и.* Сәс, һаҡал ала, буяй һәм тарай торған урын.

**ПАРИТЕ́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Бәхәсле эште ҡарағанда ҡаршы тарафтарҙың тиң хоҡуҡлығы. *Паритет башланғыстарҙа.* ■ *Кешелек донъяһына космосҡа юл асыҡ. Хәрби стратегик паритетты тәьмин иттек, был иһә империализмдың ядро һуғышы башлауға йүнәлтелгән агрессив пландары һәм мөмкинлектәрен байтаҡҡа сикләне.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.

**2.** *эк.* Төрлө ил аҡсаһының алтынлата иҫәпләнгән нисбәте. *Үткән аҙна эсендә уның [фунттың] курсы паритеттан түбәнерәк төштө.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 9 июль.

**ПАРК** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* **1.** Йөрөр юлдары, сәскәлектәре булған ял баҡсаһы; ағас баҡсаһы. *Ҡала паркы.*

**2.** Транспорт сараларының тора һәм ремонтлана торған урыны. *Трамвай паркы. Троллейбус паркы.* / *хәрби* Ғәскәрҙе һуғыш кәрәк-ярағы, ҡорал-ҡорамал менән тәьмин итә торған күсмә склад. *Артиллерия паркы.*

**3.** *махс.* Теге йәки был халыҡ хужалығы тармағының, промышленность өлкәһенең һ. б. етештереү саралары, ҡорал-ҡорамалы. *Станоктар паркы. Төҙөлөш машиналары паркы.*

**ПАРКЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** *йыйн.* Ҡорамалап, ҡоршап түшәлә торған ваҡ иҙән таҡтаһы. *Имән паркет. Паркет түшәү. // Паркет иҙән.*

**2.** Шул таҡтанан түшәлгән иҙән. *Паркетты шымартыу.*

**ПАРЛАҒЫС: аҙыҡ парлағыс** *ҡар.* **бешекләүес.**

**ПАРЛАҠ** [*төрк.*] *с.* **1.** *иҫк. кит.* Ялтлап, балҡып торған.

**2.** *күсм.* Бик яҡшы, иң киткес шәп. *Парлаҡ заман. // Парлаҡ йәшәү.*

**ПАРЛА́МЕНТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Капиталистик илдәрҙәге тулыһынса йәки бер тиклем һайлап ҡуйылған юғарғы дәүләт мәжлесе. *Буржуаз парламент. Милли парламент. Парламент депутаты.*

**ПАРЛАМЕНТАР** [*рус.* парламентарный] *с.* Парламентаризмға нигеҙле. *Парламентар республика.*

**ПАРЛАМЕНТАРИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Башында парламент торған хөкүмәт системаһы.

**ПАРЛАМЕНТА́РИЙ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Парламент ағзаһы.

**ПАРЛАМЕНТЕ́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Һуғышта дошман тарафына һөйләшеү өсөн ебәрелгән кеше.

**ПАРЛАМЕНТЛЫ** *с.* Парламенты булған. *Парламентлы дәүләт.*

**ПАРЛАНДЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **парландырыу** [1].

**ПАРЛАНДЫРЫУ** [1] *к.* Парға, ҡайнар һыуға бешереп, йомшартыу. *Һаламды парландырып, әсетеп биреү.*

**ПАРЛАНДЫРЫУ** [2] *к.* Парлы [2] (2 мәғ) итеү. *Ҡыҙ менән егетте парландырыу.*

**ПАРЛАНЫУ** [1] *к.* **1.** *төш. кар.* **парлау** [1]. *Парланған һалам.*

**2.** Парға әйләнеү; боҫрау. *Һыу парланып тора.*

**ПАРЛАНЫУ** [2] *к. төш. кар.* **парлау** [2] 1, 2.

**ПАРЛАНЫШЫУ** *к.* Ир менән ҡатын йәки егет менән ҡыҙ булып ҡушарлашыу; икәүләшеү. *Парланышып йөрөү. Парланышып ултырыу.*

**ПАРЛАУ** [1] *к.* Парға бешереү, пар менән бешекләү. *Парлап бирһәң, һаламды мал ятатып ашай.*

**ПАРЛАУ** [2] *к.* **1.** Икеһен бергә килтереү, парлы итеү; ҡушарлау. *Ултырғыстарҙы парлап ҡуйыу.* ■ *Парлап та ғына парлап ат ектергән, һай түрәкәйгенәһе* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ише менән бергә ҡушыу; ишен табып, берләштереү. *Сынаяҡты парлап ҡуйыу.* ■ *[Егет— ҡыҙға:] Мә, икенсе һыңарын да алып килдем [ҡатаның], парлап кейерһең* (Әкиәттән).

**3.** Икеһен бергә берләштереү; ҡушарлау. *Парлап кунаҡҡа сакырыу. Парлап ултыртыу. Парлап бейеү.* ■ *Йәш килендәр шаршау ҡорғандар ҙа, парлап, талығып, төндә йоҡлайҙар.* Ғ. Амантай.

**ПАРЛАШЫУ** *к.* **1.** Икәү берләшеү; икәүләшеү. *Атаһы менән парлашып, Айҙар бер көндө байрам бүләге һайлашып алып йөрөнө.* Х. Ғиләжев.

**2.** Икеһе бергә берләшеү; ҡушарлашыу. *Парлашып кунаҡҡа йөрөү. Парлашып ултырыу* ■ *Бына бер егет, бер ҡыҙ парлашып, етәкләшеп, туңәрәк булып теҙелә башланы.* Т. Йәнәби. *Ҡоштар .. алыҫ юлға китер алдан парлаша.* И. Ғиззәтуллин.

**ПАРЛЫ** [1] *с.* Эҫе, еүеш һауалы; эҫе ташлы. *Парлы мунса.*

**ПАРЛЫ** [2] *с.* **1.** Икеһе ҡушарлы; ишле. *Парлы нәмә. Парлы сынаяҡ.*

**2.** Икеһе бергә бәйле; ҡушар. *Парлы кунаҡ.*

**ПАРНА** *и. диал. кар.* **пар** [3].

**ПАРНИ́К** [*рус.*] *и.* Быялалы рам менән ҡапланған йылы түтәл (иртә яҙҙан йәшелсә үҫтереү өсөн). *Йәшелсәне парниктарҙа үҫтереү.*

**ПА́РНИК** [*рус.*] *и. диал.* Сәйгүн.

**ПАРОВО́З** [*рус.*] *и.* Тимер юлдан йөрөй торған пар двигателле локомотив. *Паровоз депоһы. Паровоз мейесе.* ■ *Паровоз вагондарҙы алып китте, Хыялбайға китергә лә ваҡыт етте.* Ш. Бабич.

**ПАРОГЕНЕРА́ТОР** [*рус.*] *и.* Атмосферанан юғары баҫымлы пар етештерә торған аппарат.

**ПАРО́ДИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** Берәй әҫәрҙе көлкөгә алып, шуға оҡшатып яҙылған әҫәр. *Музыкаль пародия. Әҙәби пародия. Пародия жанры.*

**2.** *кусм.* Ниҙеңдер төп асылын боҙоп, тыштан ғына оҡшатҡан нәмә.

**ПАРОДИЯСЫ** *и.* Пародия яҙыусы, пародия авторы.

**ПАРО́ЛЬ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Йәшерен, шартлы һүҙ йәки нәмә (хәрби хеҙмәттә йәки йәшерен ойошмаларҙа үҙ кешеңде белеү өсөн ҡулланыла). *Мин төндә уларҙың шпионын тотоп, бөтә серҙәрен, паролдәрен белдем.* Б. Хәсән.

**ПАРО́М** *и.* [*рус.*] *кар.* **борам.**

**ПАРОМЕ́Р** [*рус.*] *и.* Эшкә тотонолған парҙың иҫәбен алып тора торған прибор.

**ПАРОПРОВО́Д** [*рус.*] *и.* Пар йөрөй торған торбалар системаһы.

**ПАРОТИ́Т** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. мед.* Ҡолаҡ төбөндәге биҙҙең шешеүе. *Эпидемик паротит.*

**ПАРОХО́Д** [*рус.*] *и.* Пар двигателле карап. *Йылға пароходы. Буксир пароходы.* ■ *Пароходтар Иҙел буйлап бара, бөҙрә тулҡындарҙа тирбәлеп.* Ғ. Сәләм.

**ПАРОХО́ДСТВО** [*рус.*] *и.* Пароход менән пассажирҙарҙы һәм йөктәрҙе ташыу эшенә идара итә торған ойошмалар. *Агиҙел пароходствоһы.*

**ПАРСА** [1] [*фарс.*] *и.* **1.** Алтын, көмөш еп ҡушып һуғылған ебәк туҡыма. *Биҙәкле парса. // Парса күлдәк.*

**2.** Тауарҙағы эре биҙәк. *Парсалы шәл.* ■ *Ал биҙәкле йәшел күлдәк — киҫһәм, китә парсаһы* (Бәйеттән).

**ПАРСА** [2] [*фарс.*] *и. кит.* **1.** Киҫәк, өлөш. *Бер минут бар доньяһын карғап ҡабынды уттарым, янды, көйҙө, парса-парса булды меңкен күкрәгем.* Ш. Бабич.

**2.** Бәләкәй, теҙмә йәки сәсмә әҫәр. *Сатирик парса.* ■ *«Башкортостан» газетаһында уның [Ғ. Сәләмдең] «Йүгерек ҡәләм» исемле әҙәби парсаһы баҫылып сыкты.* С. Сафуанов.

◆ **Йөрәгем парсаһы** иркәләтеп әйтә торған һүҙ. *Күҙ нурым, бәпкәм, гүзәл сәскәм, йөрәгем парсаһы, һин минең алтын, зөбәржәт, ынйы, гәүһәр — барсаһы!* Д. Юлтый.

**ПА́РТА** [*рус.*] *и.* Өҫкө таҡтаһын ауыш итеп, ширлек менән тоташтырып яһаған мәктәп өҫтәле. *Ултыраһың партаға һин мәктәпкә барғас та.* Ғ. Ғүмәр.

◆ **Мәктәп партаһынан** бала саҡтан. *[Сәгиҙә:] Беҙ, уҡыусылар, балаларҙы мәктәп партаһынан уҡ ауыл хужалығы эштәре менән таныштыра башларға тейешбеҙ.* М. Тажи.

**ПАРТАКТИ́В** [*рус.*] *и.* КПСС ағзаларының партия активы. *Партактив йыйылышы.*

**ПАРТБИЛЕ́Т** [*рус.*] *и.* КПСС ағзаһының билеты.

**ПАРТБЮРО́** [*рус.*] *и.* Советтар Союзы Коммунистар партияһының тәүге ойошмаһында һайлап ҡуйыла торған етәксе орган; партия бюроһы. *Партбюро ағзаһы. Партбюро секретары.*

**ПАРТВЗНО́С** [*рус.*] *и.* КПСС ағзаларының ай һайын түләй торған взносы; партия взносы. *Партвзнос түләү.*

**ПАРТГРУПО́РГ** [*рус.*] *и.* Партгруппа етәксеһе.

**ПАРТГРУ́ППА** [*рус.*] *и.* КПСС-тың тәүге ойошмаһының эсенә ингән партия группаһы.

**ПАРТЕ́Р** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Тамаша залының түбәнге ҡаты. *Партерҙағы урын. Партерҙа ултырыу.*

**ПАРТИЗА́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Дошман тылында һуғышҡан ирекле ғәскәр ағзаһы. *Партизандар хәрәкәте. Партизандар отряды.* ■ *Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында .. партизандар Совет ғәскәренең ярҙамсыһы булды.* «Ағиҙел», 1965, № 5.

**ПАРТИЗАНЛЫҠ** *и.* Үҙ аллы хәрәкәт иткән отрядтарҙың дошман тылындағы хәрәкәте, көрәше. *Партизанлыҡҡа яҙылыу.*

□ **Партизанлыҡ итеү** партизандар хәрәкәтендә ҡатнашыу.

**ПАРТИТУ́РА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Күп тауышлы музыкаль әҫәрҙең инструмент һәм тауыш партиялары өсөн булған ноталы яҙыу. *Операның партитураһы. Симфония партитураһы.* / Музыкаль әҫәрҙең бөтә партиялары яҙылған нота дәфтәре.

**ПА́РТИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Берәй синыфтың мәнфәғәтен яҡлау, маҡсатын үткәреү, ижтимағи көрәшенә етәкселек итеү өсөн төҙөлгән политик ойошма. *Буржуаз партиялар. Политик партиялар.*

**2.** Советтар Союзының Коммунистар партияһы. *Партия съезы. Партия ағзаһы. Партия билеты. Партияға инеү.*

**3.** Берәй маҡсат менән берләшкән йәки берләштерелгән кешеләр төркөмө. *Геологик партия. Топографтар партияһы.*

**4.** Низеңдер билдәле һандағы бер өлөшө. *Радиоприёмниктарҙың яңы партияһын эшләп сығарыу.*

**5.** Күп тауышлы музыка әҫәренең бер йырсы йәки бер музыка ҡоралы тарафынан башҡарыла торған өлөшө. *«Салауат Юлаев» операһындағы Көнбикә партияһы.* / Шундай өлөштөң ноталары.

**6.** Шахмат, шашка һ. б. баштан аҙаҡҡа тиклемге уйын. *Кәшиф шахмат тактаһын куйып: «Әйҙә, Ғәлимә, сәй ҡайнағансы бер партия уйнап алайыҡ»,— тине.* А. Таһиров.

**ПАРТИЯЛЫ** *с.* **1.** Партия ағзаһы булып торған. *Партиялы эшсе.*

**2.** Билдәле бер партия принциптарына ярашлы йәки мөнәсәбәтле. *Партиялы философия.* / Марксистик партия принциптарына ярашлы. *Партиялы караш.*

**ПАРТИЯЛЫЛЫҠ** *и.* Билдәле бер партия, синыф принциптарына һәм мәсьәләләренә ярашлылыҡ. / Марксистик-ленинсы партия принциптарына ярашлылыҡ. *Сәнғәттең партиялылығы. Әҙәбиәттең партиялылығы.*

**ПАРТИЯҺЫҘ** *с.* **1.** Партияла ағза булып тормаған.

**2.** Партия принциптарына мөнәсәбәтһеҙ.

**ПАРТКАБИНЕ́Т** [*рус.*] *и.* КПСС комитеттары янындағы политик мәғариф кабинеты. *Завод парткабинеты.*

**ПАРТКО́М** [*рус.*] *и.* КПСС-тың тәүге партия ойошмаһында һайлап ҡуйылған етәксе органы; партия комитеты. *Завод парткомы. Партком ултырышы.* / Шул комитет урынлашҡан бина.

**ПАРТНЁР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Кем менәндер берәй уйында (спектакль, спорт, кәрт һ. б.), тансала бергә ҡатнашҡан кеше. *Тәжрибәһеҙ шахматсы.., хәҙер бер фигураны күсереп партнерымдың ем, ти ҙә, үҙе еңелеп ҡала.* Х. Мохтар. *Ролд миңә тапшырҙылар. Ғиләж Казанский мине партнерым булды.* «Ағиҙел», 1968, № 5. / Берә эштәге иптәш, компаньон.

**ПАРТО́РГ** [*рус.*] *и.* Партгруппаның етәксеһе *Цех парторгы.*

**ПАРФЮМЁР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Парфюмерия нә мәләре эшләй торған эшсе.

**ПАРФЮМЕ́РИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. йыйн.* **1.** Кос метикала һәм гигиена маҡсатында ҡулланыл торған хушбый һ. б. нәмәләр. *Парфюмерия маг зины.*

**2.** Шул нәмәләрҙе етештерә торған промыш ленность тармағы.

**ПАРӘ** *и. иҫк. кит.* **1.** *кар.* **пара.**

**2.** Төркиәлә аҡса берәмеге. *Парә ягынан д эштәрем рәтләнде.* М. Ғафури.

**ПАС** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и. спорт.* Туптың үҙ ко мандаңдағы кешегә бирелеүе (мәҫ. футбол, во лейбол уйынында).

**ПАСКА́ЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Халыҡ-ара берәме системаһында баҫым һәм механик көсөргәнеш берәмеге.

**ПА́СКВИЛЬ** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и. кит.* Яла яғып мыҫҡыл итеп яҙылған әҫәр.

**ПА́СПОРТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Кешенең шәхесен гражданлығын күрһәтә торған документ. *Сове паспорты. Сит ил паспорты. Паспорт алыу.*

**2.** Предприятие, ҡоролма йәки башҡа нәмәлә тураһында мәғлүмәт биргән танытма. *Заводты паспорты. Станоктың паспорты. Сәғәттең пас порты.*

**ПАСПОРТИ́СТ** [*рус.*] *и.* Паспорт бүлегенд эшләгән кеше. / Паспортты пропискаға алы эшен башҡарған кеше.

**ПАСПОРТЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Паспорт система һына күсереү, паспорт менән тәьмин итеү.

**ПАССА́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Ике яҡлап теҙеле киткән күп магазиндан параллель урамдарға сығыу юлы булған башы ябыҡ галерея.

**2.** Ноталарҙың бик тиҙ эҙмә-эҙлекле юғарына түбәнгә йәки киреһенсә сиратлашыуынан ғиба рәт музыкаль әҫәр өлөшө.

**ПАССАЖИ́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ниндәйҙер транс порт менән китеп барған кеше. *Пассажир само лёты. Пассажир поезы. Пассажир теплоходы.*

**ПАССА́Т** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Океандарҙың тропик киңлектәрендә йыл әйләнәһе буйынса тотороҡло һауа ағымы.

**ПАССИ́В** [1] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Предприятиеның бөтә бурыс һәм йөкләмәләре; *киреһе* актив [2]. *Банктың пассивы.*

**ПАССИВ** [2] [*рус.* пассивный] *с.* Эшмәкәрһеҙ, һүлпән, вайымһыҙ; *киреһе* актив [3]. *Пассив ҡараш. Пассив протест. Пассив ял. // Пассив эшләү.*

**ПАССИВЛЫҠ** *и.* Эшмәкәрһеҙлек, һүлпәнлек, вайымһыҙлыҡ. *Пассивлыҡ күрһәтеү.* ■ *Әйтеп, туҡтауһыҙ өйрәтеп тороуҙан балаларҙа пассивлыҡ барлыҡҡа килә.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1965, № 1.

**ПА́СТА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *м.* Һылашып торған ҡуйыл тмаҡ нәмә (төрлөһө төрлө маҡсатта ҡулланыла). *Теш пастаһы. Томат пастаһы.*

**ПАСТЕРИЗА́ТОР** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Пастеризация яһай торған аппарат.

**ПАСТЕРИЗА́ЦИЯ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Аҙыҡтың зарарлы микробтары үлеп, тәм сифаты, витамины һ. б. һаҡлана торған 60—70 градусҡа тиклем эҫетелеүе. *Пастеризация яһау.*

**ПАСТЕРИЗАЦИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **пастеризациялау.** *Пастеризацияланған һөт.*

**ПАСТЕРИЗАЦИЯЛАУ** *ҡ.* Пастеризация яһау. *Консерваларҙы пастеризациялау. Һөттө пастеризациялау.*

**ПАСТИЛА́** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Емеште иҙеп, шәкәргә ҡайнатып, йомортҡа ағына туҡып әҙерләнгән тәм-том.

**ПА́СХА** [*рус.* 〈 *боронғо евр.*] *и.* **1.** Йәһүдтәрҙең яҙғы дини байрамы.

**2.** Христиандарҙың христиан диненә мифик нигеҙ һалған Христың тыуыуын... ерелеүенә бағышланған байрамы. *Пасха көнө.*

**ПАТ** [*рус.*<*фр.*] *и.* Шахмат уйынында шахһыҙ көйө королгә йөрөр юл ҡалмаған хәл.

**ПАТЕ́НТ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Уйлап табыусының авторлыҡ хоҡуғын раҫлаған документ. *Патент хоҡуғы. Патент һалымы. Патент алыу.*

**ПАТЕНТЛАУ** *ҡ.* Уйлап табылған нәмәгә патент. *Асышты патентлау.*

**ПАТЕНТЛЫ** *с.* Патенты булған. *Патентлы дарыу.*

**ПАТЕТИК** *с.* Ялҡынлы дәрт, күтәренке рух менән һуғарылған. *Патетик телмәр.* ■ *Абдулхаҡ Игебаев Ер-әсә образына патетик әҫәр ижад итте.* Р. Шәкүр.

**ПАТЕ́ТИКА** [*рус.*] *и.* Берәй нәмәлә ялҡынлы дәрт, күтәренке рух менән һуғарылған тон. *Я. Хамматов башҡорт прозаһын нык йонсоткан ялангас патетиканан арынған.* Ә. Хәкимов.

**ПАТЕФО́Н** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Махсус пластинкаға яҙылған тауышты уйната торған аппарат. *Патефон пластинкаһы. Патефон уйнатыу.*

**ПАТОГЕНЕ́З** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. мед.* Ауырыуҙың башланғандан алып көсәйгәнгә тиклемге барышы һәм патологияның шул процессы өйрәнә торған бүлеге.

**ПАТОГЕНЕТИК** *с. мед.* Патогенезға мөнәсәбәтле.

**ПАТОЛОГИК** *с.* **1.** Патологияға (1 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Патологик анатомия.*

**2.** *күсм. кит.* Тейешле хәлдән ситкә тайпылышлы; ауырыуға бәйле. *Патологик күренеш.*

**ПАТОЛО́ГИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** Кеше һәм хайуан организмында төрлө сирҙең барлыҡҡа килеп, уның процесын һәм норманан ситләшеүен өйрәнә торған фән. *Дөйөм патология. Туберкулез патологияһы.*

**2.** *мед.* Организмдағы ауырыу процестары, норманан тайпылыштар. *Тамырҙарҙың патологияһы.*

**3.** *күсм. кит.* Тейешле хәлдән ситкә тайпылыш.

**ПАТРИА́РХ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** Ырыу башлығы. *Сәс, һаҡалына сал төшкән был патриарх тышҡы күренеше менән башҡаларҙан бер ҙә айырылмай.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 24 июнь.

**2.** Провославие динендәге иң юғарғы рухани дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше.

**ПАТРИАРХАЛЬ** [*рус.* патриархальный] *с.* **1.** Патриархат дәүеренә мөнәсәбәте, патриархатҡа хас. *Патриархаль ырыу.*

**2.** Элекке замандағы кеүек, боронғо традицияларға тоғро, яңы культураға ят. *Патриархаль йола. Патриархаль ҡараш. Патриархаль тәрбиә.*

**ПАТРИАРХА́Т** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Тәүтормош ҡәбиләселек королошоноң ирҙәр хакимлеге менән билдәләнгән һуңғы дәүере.

**ПАТРИО́Т** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Илен яратҡан, иленә фиҙаҡәр булған кеше; илһөйәр. / *күсм.* Ниҙелер ысын күңелдән яратҡан кеше. *М. А. Ҡулаев .. туған теленең ысын патриоты була.* Ж. Кейекбаев.

**ПАТРИОТИ́ЗМ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Илгә булған яратыу хисе, фиҙаҡәрлек. *Патриотизм күрһәтеү.*

**ПАТРИОТИК** *с.* Патриотизм менән һығарыулы. *Патриотик шиғыр. Йәштәрҙе патриотик рухта тәрбиәләү.*

**ПАТРИОТЛЫҠ** *и. ҡар.* **патриотизм.** *Патриотлыҡ тойғоһо.*

**ПАТРИ́ЦИЙ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и. тар.* Боронғо Римдағы юғары ҡатлам кешеһе.

**ПАТРО́Н** [1] [*рус.* 〈 *лат.*] *и. тар.* Боронғо Римда ярлы йәки хоҡуҡһыҙ граждандарҙы үҙ яҡлауына алып, үҙенә ҡарата бойондороҡло хәлдә иткән тулы хоҡуҡлы кеше.

**ПАТРО́Н** [2] [*рус.*<*фр.*] *и.* **1.** Бер бөтөндө берләштереп, гильзаға һалынған дары менән яһалған пуля йәки дороп һәм ҡабыҙғысы менән капсюль. *Ҡулыбыҙҙа патрон бөткәс, штык менән ташландыҡ* (Бәйеттән).

**2.** Лампочкаһын селтәргә тоташтырыу өсөн бороп ҡуя торған яҡтыртҡыс приборҙың бер өлөшө.

**ПАТРОНЛЫҠ** *и.* Мылтыҡ көбәгенең патрон [2] (1 мәғ.) урынлашҡан артҡы өлөшө.

**ПАТРО́ННИК** [*рус.*] *и. ҡар.* **патронлыҡ.**

**ПАТРОНТА́Ш** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Патрон [2] (1 мәғ.) һауыты; саҡса. *Патронташ ҡайышы.* ■ *[Азамат] патронташты биленә быуып, мылтыҡты яңынан уң ҡулына алды ла .. тышҡа сыҡты.* К. Даян.

**ПАТРУ́ЛЬ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Билдәле бер урында тәртип һәм хәүефһеҙлек һаҡлау өсөн йөрөгән хәрби подразделение, милиция йәки йәмәғәтселек һағының ҙур булмаған, ғәҙәттә ҡоралы төркөмө йәки карабы, самолеты һ. б. *Йәшел патруль* (урман һаҡлау буйынса). *Хәрби патруль. Милиция патруле. Патруль самолёты. Патруль хеҙмәте. Патрулдә йөрөү.* ■ *Урамда йөрөүсе юҡ, өсәр-дүртәр ҡыҙылгвардеецтан торған патрулдәр генә күренгеләй.* А. Таһиров. / Шул төркөмдәге кеше һ. б.

**ПА́УЗА** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Һүҙ, телмәр барышында яһалған тыныш. *Пауза яһау.*

**2.** *муз.* Яңғырауҙағы ритмик тәртипкә килтерелгән тыныш. / Шул тынышты ноталарҙа билдәләү өсөн булған тамға.

**ПА́ФОС** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** Ялҡынлы дәрт, рух күтәренкелеге. *Пафос менән һөйләү.* ■ *Дивизияла яҙып алынған бәйет һәм йырҙарҙың береһендә лә рух төшөнкөлөгө юҡ. Уларҙа пафос, юғары тойғо яңғырай.* К. Мәргән.

**2.** Юғары идеянан килгән илһам, дәрт, энтузиазм. *Социалистик төҙөлөш пафосы.*

**ПАФОСЛЫ** *с.* Дәрт, күтәренке рух менән һуғарыулы. *Пафослы әҫәр.*

**ПАЦИЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Врачка күренергә килгән кеше.

**ПАЦИФИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡатнашыусылары һәр төрлө һуғышҡа, шул иҫәптән милли азатлыҡ һәм революцион һуғыштарға ҡаршы булған хәрәкәт.

**ПАЦИФИ́СТ** [*рус.*] *и.* Пацифизм яҡлы кеше.

**ПАЦИФИСТИК** *с.* Пацифизмға мөнәсәбәтле, пацифистарға хас. *Пацифистик ҡараш. Пацифистик декларация.*

**ПА́ЧКА** [*рус.*] *и.* Эсенә нимәлер йыйып һалынған бәләкәй ҡағыҙ ҡумта; ҡап. *Бер пачка сәй.*

**ПАША** *и.* Солтан төркиәһендә, Египетта һәм ҡайһы бер мосолман илдәрендә юғары хәрби һәм граждан сановниктарға бирелгән хөрмәтле титул һәм шул титулдағы кеше. *Төрөк пашаһы.* ■ *Паша булып, йәриәләр алып, кәйеф ҡылырға була ине. Ләкин был бер ҡараңғы юлдыр.* З. Һаҙый.

**ПАШАЛЫҠ** *и.* Солтандар хакимлек иткән Төркиәлә: паша етәкселегендәге өлкә.

**ПАШТЕ́Т** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ит, бауыр, балыҡты үткәреп, ни ҙә булһа ҡушып, иҙеп яһаған ашамлыҡ. *Бауыр паштеты.*

**ПАШЫЙ** *и. диал.* Ҡатын-ҡыҙ эшенә оҫта ир.

**ПАЮСЛЫ** *с.*: **паюслы уылдырыҡ** бикре кеүек балыҡтарҙың үҙенә бер төрлө (бөртөклөнән айырмалы рәүештә) әҙерләнгән ҡара уылдырығы. *Бөртөклө һәм паюслы уылдырыҡ тултырылған банкалар төрлө ҡалаларға, сит илдәргә оҙатыла.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 6 август.

**ПАЯ́ЛЬНИК** [*рус.*] *и.* Тимер, баҡыр кеүек нәмәләрҙе ҡурғаш иретеп йәбештерә, ямай торған ҡулайлама. *Электр паяльнигы.*

**ПАЯТЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **паятлау.** *Ҡомғанды паятлатыу.*

**ПАЯТЛАУ** [*рус.* паять] *к.* Тимер, баҡырҙы ҡурғаш иретеп йәбештереү, ямау. *Самауырҙы паятлау.*

**ПАЯ́ТЬ** [*рус.*]: **паять итеү** *һөйл.* паятлау.

**ПЕДАГО́Г** [*рус.* ⟨ *гр.*] и. Уҡытыу, тәрбиә биреү эшендәге кеше; уҡытыусы. *Уҡыусыларҙың аҡылын, белемен генә түгел, хисен, фекерен үҫтереп, ижад һуҡмағынан атлатыу һәр педагогтың изге бурысы.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 21 март.

**ПЕДАГОГИК** *с.* Педагогка мөнәсәбәтле. *Педагогик кадрҙар. Педагогик совет. Педагогик институт.* / Педагогҡа хас. *Педагогик оҫталыҡ. Педагогик һәләтлек.*

**ПЕДАГО́ГИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тәрбиә һәм белем биреү тураһындағы фән. *Педагогикаға бәйле әҙәбиәт.*

**ПЕДА́ЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *м.* Аяҡ баҫмағы (төрлө машинала, музыкаль ҡорамалда һ. б.); тәпәлдерек. *Велосипед педале. Рояль педале.* ■ *Кәли тракторын тоҡандырып, менеп ултырҙы. Педалдәренә баҫып, тикшереп ҡараны.* И. Насыри.

**ПЕДА́НТ** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Фән, ғилемдә, тормошта һ. б. формаль яҡҡа ныҡ иғтибар биргән кеше.

**ПЕДАНТИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Берәй нәмәлә артыҡ формализм, ныҡ аныҡлыҡ.

**ПЕДАНТИК** *с.* Педантизмға тартым. *Педантик мөнәсәбәт.* / Педантизм менән башҡарылған. *Педантик теүәллек.*

**ПЕДИА́ТР** [*рус.*] *и.* Балалар врачы, педиатрия буйынса белгес.

**ПЕДИАТРИК** *с.* Педиатрия өлкәһенә мөнәсәбәтле. *Педиатрик институт.*

**ПЕДИАТРИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Балалар организмының анатомияһын һәм физиологияһын, балалар ауырыуын, уны дауалау һәм иҫкәртеү юлдарын өйрәнә торған фән.

**ПЕДИКЮ́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Аяҡтың тырнағын та ҙартыу һәм аяҡтағы сөйәлде бөтөрөү эше. *Педикюр кабинеты. Педикюр яһатыу.*

**ПЕДИНСТИТУ́Т** [*рус.*] *и.* Педагогик институт (урта мәктәп уҡытыусылары әҙерләй торған юғары уҡыу йорто).

**ПЕДСОВЕ́Т** [*рус.*] *и.* Уҡытыусыларҙың мәктәп эшенә бәйле мәсьәләләрҙе хәл итә торған йыйылышы; педагогик совет.

**ПЕДУЧИ́ЛИЩЕ** [*рус.*] *и.* Башланғыс мәктәптә уҡытыусылар, шулай уҡ балалар баҡсаһына тәрбиәселәр әҙерләй торған урта уҡыу йорто; педагогик училище.

**ПЕЙЗА́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Берәй ерҙең дөйөм күренеше, тәбиғәт картинаһы; ландшафт. *Урман пейзажы. Урал пейзажы.* ■ *Ауыл. Урман буйы. Көтөү сыға. Миңә һәйбәт пейзаж күренә.* М. Хәй.

**2.** Тәбиғәт күренешен кәүҙәләндергән һүрәт. *Пейзаж төшөрөү.* / Тәбиғәттең әҙәби эҫәрҙә һүрәтләнеше. *Романдағы пейзаж.*

**ПЕЙЗАЖСЫ** *и.* Пейзаж төшөргән художник.

**ПЕКА́РНЯ** [*рус.*] *и.* Икмәк бешерә торған бәләкәй предприятие. *Икмәкте өйҙә бешереп ыҙаланыуҙың да кәрәге ҡалмаған. Пекарня күпереп торған, ашап туйғыһыҙ икмәк бешерә.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 2 июнь.

**ПЕ́КАРЬ** [*рус.*] *и.* Икмәк бешереү менән шөғөлләнгән эшсе.

**ПЕ́ЛЕНГ** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и. махс.* Компас теленең йүнәлеш менән күренгән нәмәгә йәки ишетелгән тауышҡа ҡараған йүнәлеш араһындағы мөйөш.

**ПЕЛЕНГА́ТОР** [*рус.*] *и.* Пеленгылай торған прибор. *Оптик пеленгатор. Тауыш пеленгаторы. Радио пеленгаторы. Пеленгатор антенналары.*

**ПЕЛЕНГЫЛАУ** *к. махс.* Пеленгын табып, ниҙеңдер торған урынын билдәләү. *Радиостанцияны пеленгылау.*

**ПЕЛИКА́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Оҙон, ҙур суҡышлы, суҡыш аҫты муҡсалы эре һыу ҡошо; баба ҡошо.

**ПЕЛТ** *окш.* Шәм һ. б. шундай нәмәнең ҡапыл һүнгәнен белдергән һүҙ.

**ПЕЛТ-ПЕЛТ** *окш.* Ҡабат-ҡабат пелт иткәнде белдергән һүҙ. *Пелт-пелт итеү. Пелт-пелт килеү.*

**ПЕЛӘШ** *с. ҡар.* **ялтас** 2.

**ПЕ́МЗА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Төрлө нәмәне полировкалау, шымартыу, фильтрлау, еңел бетон етештереү һ. б. өсөн ҡулланылған тишекле-тишекле бик еңел вулкан тау тоҡомо.

**ПЕНА́Л** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡәләм, ручка, перо һаҡлау өсөн булған оҙон һауыт, футляр.

**ПЕНА́ЛЬТИ** [*рус.*<*ингл.*] *и. спорт.* Футбол, хоккейҙа йыраҡ булмаған аранан ҡапҡаға штраф бәреү.

**ПЕНИЦИЛЛИ́Н** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Үңәҙ бәшмәгенән яһалған антибиотик дарыуҙарҙың бер төрө (эренле сирҙәрҙе дауалағанда ҡулланыла).

**ПЕ́ННИ** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* **1.** *кар.* **пенс.**

**2.** Фин маркаһының йөҙҙән беренә тиң ваҡ аҡса.

**ПЕНОПЛА́СТ** [*рус.*] *и.* Күбек һымаҡ көпшәк пластмасса. *Пенопластан яһау. // Пенопласт уйынсыҡтар.*

**ПЕНС** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* Шиллингының ун икенән беренә тиң ваҡ инглиз аҡсаһы.

**ПЕНСИОНЕ́Р** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Пенсия алған кеше. *Персональ пенсионер.*

**ПЕ́НСИЯ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Зәғифлек йәки ҡартлыҡ көнөндәге кешеләргә аҡсалата бирелгән даими дәүләт ярҙамы. *Персональ пенсия. Ҡартлыҡ пенсияһы. Пенсия алыу. Пенсияға сығыу. Пенсия кенәгәһе.*

**ПЕНСНЕ́** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Танау биленән ҡыҫтырып ҡуя торған күҙлек.

**ПЕ́НЯ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Тейешле йөкмәткене ваҡытында үтәмәгән өсөн алына торған штраф. *Пеня түләү. Пеня алыу.*

**ПЕ́ПЕЛЬНИЦА** [*рус.*] *и. шул уҡ* **төпсөк һауыты** (*кар.* **һауыт**).

**ПЕРГА́МЕНТ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** Ҡағыҙ һымаҡ итеп эшләнгән йоҡа аҡ күн (борон яҙыу өсөн ҡулланылған).

**2.** Шул күнгә яҙылған боронғо ҡульяҙма.

**3.** Май, һыу үткәрмәй торған йылтыр ҡағыҙ.

**ПЕРЕВОРО́Т** [*рус.*] *и.* Ғәмәлдәге ижтимағи-политик системаның нигеҙҙән үҙгәртелеше. *Хәрби переворот. Дәүләт перевороты.*

**ПЕ́РЕКИСЬ** [*рус.*] *и. хим.* Химик элемент әсеүенең иң юғары дәрәжәһе. *Водород перекисы. Марганец перекисы.*

**ПЕРЕКЛЮЧА́ТЕЛЬ** [*рус.*] *и.* Ниҙеңдер хәрәкәт характерын переключать итеү, үҙгәртеү өсөн булған ҡулайлама.

**ПЕРЕКЛЮЧА́ТЬ** [*рус.*]: **переключать итеү** ниҙеңдер ағымын, хәрәкәтен, бәйләнешен бер йүнәлештән өҙөп, икенсе йүнәлешкә тоташтырыу. *Газды переключать итеү. Моторҙы переключать итеү. Электрҙы переключать итеү.*

**ПЕ́РЕПИСЬ** [*рус.*] *и.* Кем йәки ниҙеңдер һанын билдәләү өсөн үткәрелгән тулы иҫәп. *Перепись үткәреү.*

**ПЕРИГЕ́Й** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. астр.* Ай йәки Ерҙең яһалма эйәрсене орбитаһының Ергә иң яҡын нөктәһе. *Спутник апогейы 39700 километрға, перегийы 460 километрға тиң булған элептик орбитаға сығарылды.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 24 апрель.

**ПЕРИГЕ́ЛИЙ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. астр.* Ҡояш тирәләй хәрәкәт иткән күк есеме орбитаһының Ҡояшҡа иң яҡын нөктәһе.

**ПЕРИКА́РД** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. анат.* Йөрәктең тышҡы ҡабы.

**ПЕРИКАРДИ́Т** [*рус.* 〈 *фр.*] *и. мед.* Йөрәктең тышҡы ҡабының шешеүе.

**ПЕРИ́МЕТР** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. мат.* Яҫы геометрик фигура яҡтарының дөйөм оҙонлоғоноң суммаһы. *Дүртмөйөштөң периметры. Өсмөйөштөң периметры.*

**ПЕРИ́ОД** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** Кире килеп ҡабатлана торған хәрәкәт йәки күренештең бүлем-бүлем ваҡыт араһы. *Тирбәлеү периоды. Әйләнеү периоды.*

**2.** *кар.* **осор** [1].

**ПЕРИОДИК** *с.* **1.** Билдәле бер ваҡыт һайын була торған, ҡабатлана торған. *Периодик ямғырҙар.*

**2.** Билдәле бер ваҡыт һайын матбуғаттан сыға торған. *Периодик баҫма. Периодик матбуғат (газета, журналдар).*

◆ **Элементтарҙың периодик системаһы** химик элементтарҙың атом ауырлығы һәм шул элементтар тарафынан барлыҡҡа килгән матдәләр үҙенсәлеге мөнәсәбәте нигеҙендә булған классификация (рус ғалимы Менделеев тарафынан әҙерләнгән).

**ПЕРИСКО́П** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Йәшенгән урындан танктан, һыу аҫты кәмәһенән һ. б. тирә-яҡты күҙәтә торған оптик прибор. *Танк перископы. Траншея перископы. Һыу аҫты кәмәһенең перископы.*

**ПЕРИТОНИ́Т** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. мед.* Ҡорһаҡ итенең шешеүе.

**ПЕРИФЕРИ́Я** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** Үҙәктән ситтәгә урын (район, өлкә). *Периферияла эшләү. Периферияла килеү.*

**2.** Берәй нәмәнең үҙәктән ситтә ятҡан өлөштәре. *Не́рвы системаһының үҙәк һәм периферия өлөштәре.*

**ПЕРИФРА́З** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. әҙ.* Ниҙелер ситләтеп атаған һүҙ (мәҫ. «ҡуян», тиеү урынына «шеш ҡолаҡ» тип әйтеү).

**ПЕРИФРАЗЛАУ** *к. әҙ.* Перифраз менән әйтеү.

**ПЕРИФРАСТИК** *с. әҙ.* Перифразға ҡоролған, перифраз булған.

**ПЕРЛАМУ́ТР** [*рус.* 〈 *нем.*] *и. кар.* **мәрүәт.**

**ПЕРМАНЕ́НТ** [1] [*рус.* 〈 *фр.*] *и. һөйл.* Электр һ. б. сара ярҙамында яһалып, бер нисә айға түҙгән бөҙрә.

**ПЕРМАНЕНТ** [2] [*рус.* перманентный 〈 *лат.*] *с.* Туҡтауһыҙ дауам иткән; дауамлы. *Перманент революция.*

**ПЕРМЯК** *и.* Коми-пермяктың иҫкергән атамаһы.

**ПЕРО́** [*рус.*] *и.* Ярым бөгөлөп, нәҙек осо теленеп, ҡараға һ. б. манып яҙыу өсөн булған тимер пластинка. *Һыҙғыс перо. Яҙыу пероһы.*

**ПЕРПЕНДИКУЛЯ́Р** [*рус.*<*лат.*] *и. мат.* Икенсе бер һыҙыҡ йәки яҫылыҡ менән тура мөйөш яһап киҫешкән тура һыҙыҡ. *Перпендикуляр үткәреү. // Перпендикуляр һыҙыҡ.*

**ПЕРРО́Н** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Поезға ултырыу өсөн йәтешләп, ҡалҡыу итеп яһалған майҙан. *Перронға сығыу.* ■ *Владимир Ильич аҡрын ғына вагонға инде лә, тәҙрәне асып, перронда торған кешеләргә ҡул болғаны.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 23 апрель.

**ПЕ́РСИК** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. кар.* **шафталы.**

**ПЕРСОНА́Ж** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Нәфис әҫәрҙә ҡатнашҡан кеше. *Ыңғай персонаж. Кире персонаж.*

**ПЕРСОНА́Л** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Рәсми ойошманың бөтә хеҙмәткәрҙәр төркөмө йәки шул төркөмдөң берәй сифат буйынса дөйөмләшкән өлөшө. *Техник персонал. Институт персоналы. Театр персоналы. Уҡытыусылар персоналы.*

**ПЕРСОНАЛЬ** [*рус.* персональный] *с.* Билдәле бер кешегә бәйле; шәхси. *Персональ пенсия. Персональ эш. Персональ күргәҙмә.*

◆ **Персональ пенсионер** персональ пенсия алған пенсионер.

**ПЕРСПЕКТИВ** [*рус.* перспективный] *с.* Киләсәкте күҙҙә тотҡан. *Перспектив план.*

**ПЕРСПЕКТИ́ВА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Күҙгә күренгән алыҫлыҡ. *Перспективалағы урман.*

**2.** Киләсәкке план, киләсәктәге мөмкинлек. *Артабанғы үҫеш перспективалары. Эш перспективалары.*

**ПЕРСПЕКТИВАЛЫ** *с.* Перспективаһы, киләсәккә мөмкинлеге булған. *Перспективалы хеҙмәткәр. Перспективалы эш.*

**ПЕРӘНИК** [*рус.* пряник] *и.* Ҡамырына тәм һалып, бал-шәкәр ҡушып, әүмәләп бешергән ваҡ икмәк. *Арыш перәнигe.*

**ПЕСЕ́ТА** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* Испанияның аҡса берәмеге.

**ПЕ́СО** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* Латин Америкаһының ҡайһы бер дәүләттәренең аҡса берәмеге.

**ПЕССИМИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Өмөтһөҙлөк, рухи төшөнкөлөк, матур киләсәккә ышанмау, һәр нәмәлә насарлыҡты күреү менән тулған донъяға ҡараш; *киреһе* оптимизм.

**ПЕССИМИ́СТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Пессимизмға тулы йәки бирелеүсән кеше.

**ПЕССИМИСТИК** *с.* Пессимизм менән һуғарылған; өмөтһөҙ. *Пессимистик ҡараш.*

**ПЕТИ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. типогр.* 8 пункт размерындағы һәр шрифтың атамаһы (ваҡ шрифтың бер төрө).

**ПЕТИ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Күмәк кешенең юғарғы хөкүмәт органдарына яҙған үтенес хаты.

**ПЕТЛИ́ЦА** [*рус.*] *и.* Айырыу билдәһе итеп формалы кейемдең яғаһы осона баҫыла торған ҡаймалы ҡыйыҡ. *[Арыҫлангәләнең] атлы гәскәр кейә торған оҙон шинель яғаһы күк сога петлица менән осланып бөткән дә өҫтөнә икешәр кубик ҡаҙалған.* Ғ. Дәүләтшин.

**ПЕТРУ́ШКА** [*рус.*] *и.* Сатыр сәскәлеләр ғаиләһенән сит-сите киҫкеләнеп торған япраҡлы, йәшкелт һары сәскәле баҡса үҫемлеге (япрағы менән тамырын ашҡа һалалар).

**ПЕТУ́НИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Эт ҡарағаты кеүектәр ғаиләһенән өйкөм эре сәскәле, ҡауырһын япраҡлы декоратив үҫемлек.

**ПЕХО́ТА** [*рус.*] *и.* Йәйәүле ғәскәр. *Пехотала хеҙмәт итеү.* **Диңгеҙ пехотаһы** хәрби диңгеҙ ғәскәрҙәре ҡарамағындағы пехота.

**ПЕЧЕНЕ́Г** [*рус.*] *и.* 9—11 быуаттарҙа Волга менән Дунай тамағы араһындағы далаларҙы биләп, күсеп йөрөгән төрки халыҡ.

**ПЕЧЕ́НЬЕ** [*рус.*] *и.* Сөсө ҡамырҙан татлап, төрлөсә ҡырҡҡылап бешергән кондитер ашамлыҡ.

**ПЕ́ШКА** [*рус.*] *и.* Шахмат уйынындағы иң бәләкәй фигура.

**ПИ** [*рус.*] *и. мат.* Түңәрәк оҙонлоғоноң үҙ диаметрына сағыштырмаһы.

**ПИАНИ́НО** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡылдары өҫтән аҫҡа тартылған ҙур ҡумта рәүешендәге баҫмаҡлы музыка ҡоралы. *Пианинола уйнарға өйрәнеү. Пианино уйнау.*

**ПИАНИ́СТ** [*рус.*] *и.* Фортепьянола уйнаған музыкант.

**ПИА́НО** [*рус.* ⟨ *ит.*] *муз.* **1.** *р.* Әкрен генә, һалмаҡ ҡына (музыкаль әҫәрҙе башҡарыу темпына ҡарата); *киреһе* форте. *Пиано йырлау. Пиано уйнау.*

**2.** *и.* Музыкаль әҫәрҙә шул рәүешле башҡарылған урын һәм шундай башҡарылыш үҙе.

**ПИА́СТР** [*рус.* ⟨ *итал.*] *и.* **1.** Төркиә, Египет һәм ҡайһы бер илдәрҙә аҡса берәмеге.

**2.** Боронғо испан ваҡ аҡсаһы песоның итальянса атамаһы.

**ПИГМЕ́Й** [*рус.*<*гр.*] *и.* Экваторҙағы расаға ингән тәпәш кәүҙәле ҡәбиләләрҙең ҡайһы берәнәлер ҡараған кеше. / Бик тәпәш кәүҙәле кешегә ҡарата әйтелә.

**ПИГМЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Тереклек һәм үҫемлек туҡымаһына билдәле бер төҫ биргән матдә. *Пигмент күҙәнәктәре. Тәндәге пигмент таптары.*

**ПИГМЕНТЛАШЫУ** *ҡ.* Пигмент йыйып, берәй төҫ алыу. *Тиренең өҫкө өлөшө пигментлаша. Күҙҙең пигментлашыуы.*

**ПИЖА́МА** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Йомшаҡ туҡыманан тегелгән куртка-салбарлы йоҡа йәки өй кейеме. *Пижама кейеп йоҡлау.*

**ПИ́К** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Тау сусағы. *Ленин пигы. Еңеү пигы.*

◆ **Пик сәғәте** транспорт, электр станцияһы һ. б. эштә иң көсөргәнешле ваҡыт.

**ПИКАДО́Р** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* Үгеҙҙе һөңгө менән сәнсеп ярһыта торған һыбайлы — үгеҙҙәр һуғышында ҡатнашыусы.

**ПИКЕ́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Самолёттың ҙур тиҙлектә баш түбән шыҡыйып осоуы. *Пикеға инеү. Пикенан сығыу.*

**ПИКЕЛАУ** *ҡ.* Ҙур тиҙлектә баш түбән осоу (самолетҡа ҡарата).

**ПИКЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Ҙур булмаған һаҡсы отряд, застава. *Атлы пикет. Пехота пикеты. Пикетта булыу.* / Шундай отряд урынлашҡан урын.

**2.** Забастовка күтәргән предприятиены штрейкбрехерҙарҙан, демонстрацияны һөжүмдән һаҡлау өсөн ҡуйылған эшселәр төркөмө.

**ПИКНИ́К** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Күңел асыу, ял итеү өсөн ҡырға, ҡала ситенә сығып яһаған йыйын. *Ирәндек буйына, Талҡаҫ күленә пикникка сыҡҡанда ул [М. Фәйзи] уйын көлкөнөң, йыр-бейеүҙең уртаһында була ине.* С. Кулибай.

**ПИКНО́МЕТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Газдарҙың, шыйыҡлыҡтарҙың һәм ҡаты есемдәрҙең тығыҙлығын үлсәй торған прибор.

**ПИКТОГРА́ММА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. махс.* Яҙманың бик боронғо формаһы булараҡ ниндәйҙер эш-хәл, ваҡиға, нәмә һ. б. һүрәтләнгән шартлы рәсем.

**ПИКТОГРАФИК** *с. махс.* Пиктографияға мөнәсәбәтле. *Пиктографик яҙма.*

**ПИКТОГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Пиктограмма ярҙамындағы боронғо яҙма.

**ПИЛОРА́МА** [*рус.*] *и.* Электр моторы ярҙамында хәрәкәткә килеп, таҡта яра торған станок.

**ПИЛО́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Осҡос аппараттарҙы йөрөткән кеше; лётчик.

**ПИЛОТА́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Осҡос аппараттарҙы йөрөтөү оҫталығы һәм самолёттың, планёрҙың төрлөсә осошо. *Юғары пилотаж.*

**ПИЛО́ТКА** [*рус.*] *и.* Хәрби кешеләрҙең козырекһыҙ йәйге еңел баш кейеме.

**ПИНГВИ́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Йөҙгөскә әйләнгән ҡыҫҡа ғына ҡанатлы, яҡшы йөҙгән, ләкин оса алмаған эре диңгеҙ ҡошо (Антарктидала йәшәй).

**ПИНГ-ПО́НГ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Өҫтәлдә сетка аша һуғып уйнай торған туп уйыны.

**ПИНЕ́ТКА** [*рус.*] *и.* Атлай башламаған балалар өсөн йомшаҡ табанлы, бәкәлдән бәйләмәле аяҡ кейеме; бышый.

**ПИНЖӘК** [*рус.* пиджак ⟨ *ингл.*] *и.* Ирҙәр костюмының йыҡма яғалы, сабыулы, төймәләргә ҡаптырмалы өҫкө өлөшө. *Ике яҡҡа ҡаптырмалы пинжәк.* ■ *Пинжәген ул [Сәйзел] ултырғысҡа элде, атлап йөрөнө ниҙер уйланып.* Ғ. Сәләм.

**ПИНЖӘК-САЛБАР** *и. йыйн.* Икеһе бер кейем итеп кейелә торған пинжәк менән салбар.

**ПИНЦЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Медицинала һәм техникала бәләкәй, мурт һәм шыма нәмәләрҙе ҡыҫып алыу өсөн ҡулланылған һығылмалы ҡыҫҡыс.

**ПИО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ал, ҡыҙыл, аҡ төҫтәге эре ялбыр сәскәле, телгеләнеп торған эре япраҡлы баҡса гөлө.

**ПИОНЕ́Р**[1] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Алыҫ, билдәһеҙ илгә башлап барып ултырған кеше.

**2.** *күсм.* Ниндәйҙер эшкә башланғыс һалған кеше.

**ПИОНЕ́Р**[2] [*рус.*] *и.* Советтар Союзында: коммунистик ирекле балалар ойошмаһының ағзаһы, шулай уҡ ҡайһы бер илдәрҙә демократик балалар ойошмаһының ағзаһы. *Пионер галстугы. Пионер ойошмаһы. Пионер лагеры.*

**ПИОНЕРВОЖА́ТЫЙ** [*рус.*] *и.* Пионерҙар ойошмаһындағы отряд йәки дружина етәксеһе.

**ПИОНЕ́РИЯ** [*рус.*] *и. йыйн.* Пионерҙар [2].

**ПИП** *окш.* Ҡаҙ, өйрәк бәпкәһенең һ. б. тауышын белдергән һүҙ.

**ПИПЕЛДӘҮ** *к.* Пип-пип итеү, пип-пип килеү. *Бәпкәләр туҡтауһыҙ пипелдәп йөрөй.*

**ПИПЕЛДӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **пипелдәү.**

**ПИПЕ́ТКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Шыйыҡлыҡты һурып алып, тамсылап, тамыҙыу өсөн булған резина башлы быяла көпшә.

**ПИП-ПИП, пип тә пип** *окш.* Ҡабат-ҡабат пип иткәндә белдергән һүҙ. *Бәпкәләр пип тә пип килә.*

**ПИР** [*фарс.*] *и. иҫк.* Дини мәҙһәп башлығы.

**ПИРАМИ́ДА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *мат.* Нигеҙе күпмөйөш йәки өсмөйөштән, ҡабырғалары уртаҡ түбәле өсмөйөштәрҙән торған геометрик есем. *Биш ҡырлы пирамида. Ҡырҡылған пирамида.*

**2.** Нигеҙе дүртмөйөштән тороп, ҡабырға ҡырҙары түбәһенә барып тоташҡан сикһеҙ ҙур итеп таштан һалынған боронғо Мысыр фирғәүендәренең кәшәнәһе; әһрам. *Боронғо пирамидалар.*

**3.** Бер нисә кеше өҫтө-өҫтөнә баҫып яһаған гимнастик йә акробатик фигура.

**4.** *хәрби* Винтовкаларҙы һаҡлай торған станок һәм шулай уҡ көбәк ауыҙҙары менән бергә килтереп ҡуйылған винтовкалар. *Ҡар аҫтынан ике йәшник патрон таптылар, пирамидаға ҡуйылған винтовкаларҙы ҡаҙып сығарҙылар.* Я. Вәлиев.

**ПИРАМИДАЛЬ** [*рус.* пирамидальный] *с.* Пирамидаға оҡшаш. *Пирамидаль тирәк.*

**ПИРАМИДО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ауыртҡанды баҫа, температураны төшөрә торған дарыу.

**ПИРА́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Диңгеҙ юлбаҫары. *Пираттар карабы.*

**ПИРИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Көкөрт йәки тимер колчеданы.

**ПИРО́Г** [*рус.*] *и. кар.* **бәлеш** [1] 1.

**ПИРОЖНЫЙ** [*рус.* пирожное] *и.* Май, шәкәргә баҫҡан ҡамырҙы төрлө тәмле нәмә менән ҡатлап бешергән кондитер ашамлыҡ.

**ПИРОКСИЛИ́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Шартлағыс матдә (шартлатыу эшендә, төтөнһөҙ дары яһауҙа ҡулланыла).

**ПИРО́МЕТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Үтә күренмәгән есемдәрҙең температураһын оптик нурланыш буйынса үлсәй торған прибор.

**ПИРОТЕ́ХНИК** [*рус.*] *и.* Пиротехника буйынса белгес.

**ПИРОТЕ́ХНИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Техниканың яна торған составтар эшләү һәм уларҙы төрлө осраҡта (мәҫ. ракета осорғанда, фейерверк, көкөртлө шашка һ. б. эшләгәндә) ҡулланыуға бәйле өлкәһе.

**ПИРС** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и. диңг.* Караптар ике яҡтан да килеп туҡтауға уңайлы булһын өсөн, ярға перпендикуляр йәки мөйөш яһап ҡуйылған махсус ҡоролма.

**ПИРӘЙӘЗ** [*рус.* переезд] *и. иҫк.* 7259 кв. метрға тиң булған ер үлсәү берәмеге (крәҫтиән хужалығында 0,5 дисәтинә). *Нәби ҡулак Шәмси әбейҙең ерен, уртағына булыр тип алған да .. бер пирәйәз урынына һигеҙ таяҡ ҡына тары сәсеп биргән.* Ә. Вәли.

**ПИС** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Бысраҡ, әшәке, түбән.

**ПИ́САРЬ** [*рус.*] *и.* Эш ҡағыҙҙары менән шөғөлләнгән вазифалы кеше. *Рота писары.* ■ *Баҡһаң, телефон линияһы өҙөлгән, .. батальон писары һәләк булған.* С. Кулибай.

**ПИСЕР** [*рус.* писарь] *и. һөйл.* Писарь.

**ПИСЛЕК** *и. иҫк. кит.* Бысраҡлыҡ, әшәкелек, түбәнлек. *Ҡайҙа баҫһам да бысраҡлыҡ һәм пислек, уҫаллыҡ һәммә картында, йәшендә.* М. Ғафури.

**ПИСТОЛЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Яҡындан ата торған ҡыҫҡа көбәкле ҡорал. *Пистолеттан атыу.*

**ПИСТО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Сәкегәндә ут сығарып, патрондағы яһаҡты тоҡандыра торған бәләкәй генә металл ҡалпаҡ. / Уйынсыҡ мылтыҡ һәм пистолет менән шартлатыу өсөн эсенә дары һалып, ситтәре йәбештерелгән ике бәләкәй генә түңәрәк ҡағыҙ.

**ПИТЕКА́НТРОП** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. антроп.* Килбәт, ҡиәфәтендә маймылға хас күп һыҙат һаҡланған бик боронғо ҡаҙылдыҡ кеше төрө.

**ПИТО́МНИК** [*рус.*] *и.* Айырым үҫемлек йәки хайуандарҙы ҡарап үҫтерә торған урын. *Агас питомнигы. Балыҡ питомнигы. Емеш-еләк питомнигы. Сәскә питомнигы.*

**ПИТО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Быуар йыландар ғаиләһенә ҡараған ағыуһыҙ йылан (тропикта йәшәй).

**ПИШКӘДӘМ** [*фарс.* ⟨ *гәр.*] *и. иҫк.* Уҡыу курсын тамамлағандан һуң да мәҙрәсәлә ҡалған кеше. // *Пишкәдәм хәлфә.* ■ *Үҙен дә тәрбиә итә алмаған пишкәдәмдәрҙең дәресе, әлбиттә, арыҫландай балаларҙы ҡәнәғәт итә алмай.* М. Ғафури.

**ПИШНӘ** [*рус.* пешня] *и. ҡар.* **һөймән.**

**ПЛАВКА** [*рус.* плавки] *и.* Һыу ингәндә, ҡыҙынғанда ирҙәр кейә торған трусик.

**ПЛАГИА́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Кеше әҫәренең үҙләштерлеүе йәки үҙ хеҙмәтендә кеше әҫәренең авторына һылтанмай ҡулланылыуы.

**ПЛАГИАТЛЫҠ** *и.* Плагиатсы шөғөлө. *Плагиатлыҡ менән шөғөлләнеү.*

**ПЛАГИАТСЫ** *и.* Плагиат эшләгән йәки плагиат менән шөғөлләнгән кеше. *Башлап яҙыусы Ф. Ф. плагиатсы булып сыкты, ул кеше әҫәрен үҙенеке итеп баҫтырған.* Ә. Әхмәтҡужин.

**ПЛА́ЗМА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *биол.* Ҡандың шыйыҡ өлөшө.

**2.** *махс.* Тигеҙ концентрациялы ыңғай һәм кире зарядтары менән ионлашҡан газ.

**ПЛАКА́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Белдереү, мәғлүмәт биреү маҡсатында халыҡ алдына эленә торған ҡыҫҡа текслы һүрәт. *Плакат һүрәте.* ■ *Уның [Бикәнең] клубында — бөхтәлек, күркәмлек. ...Матур итеп эшләнгән стендтар, плакаттар, диаграммалар үҙенә сакырып тора.* И. Ғиззәтуллин.

**ПЛАКАТСЫ** *и.* Плакат эшләү менән шөғөлләнгән рәссам.

**ПЛАН** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Айырым бер урындың, йорт-ҡорамал кеүек нәмәнең пропорциялары тулыһынса һаҡланған килеш масштабҡа һалып, бәләкәсәйтеп төшөрөлгән һыҙмаһы. *Баҫыу ереенең планы. Йорттоң планы. Ҡаланың планы. План һыҙыу.*

**2.** Билдәле бер йүнәлештәге эш сараларының алдан билдәләнгән тәртибе һәм күләме. *Биш йыллыҡ план. Перспектив план. Дәүләт планы. Квартал планы. Сәсеү планы. План бүлеге. План төҙөү. План ҡабул итеү. Планды үтәү.*

**3.** Берәй эш буйынса алдан ҡоролған уй-ниәт. *План ҡороу.* ■ *Беҙҙең план ике төрлө: йә төнгә тиклем ошонда ҡалырға, йә .. окопка табан шыуырға.* Д. Юлтый.

**4.** Яҙа йәки һөйләй торған нәмәнең эҙмәэҙлеген билдәләгән тәртип. *Дәрес планы. Романдың планы.*

**5.** Берәй нәмәнең тамашасыға ҡарата биләгән урыны. *Алғы план. Артҡы план.* / *күсм.* Ниҙеңдер әһәмиәте, мөһимлеге йәһәтенән тотҡан урыны. *Сәхнә әҫәренең социаль йөкмәткеһе тәүге планда тора.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 15 июль.

**6.** Ниҙеңдер ғәмәлләшеү өлкәһе. *Башҡорт теленең лексикаһын төрлө планда еңтекләп тикшереү.* / Ниҙелер күҙәтеү, тикшереү ысулы. *Егерменсе йылдарҙа .. әҙәби характер нигеҙҙә статик планда һүрәтләнә.* «Ағиҙел», 1967, № 1.

**ПЛАНЁР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Моторһыҙ оса торған ҡанатлы аппарат. *Планёр менән осоу. Планёр ярышы. Планёр спорты.*

**ПЛАНЕРИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Планерҙа осоу оҫталығы. *Планер спорты шөғөлө.*

**ПЛАНЁРСЫ** *и.* Планёр менән осҡан кеше.

**ПЛАНЕ́ТА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡояш тирәләй әйләнеп, унан сағылған яҡтылыҡ менән яҡтырған эре күк есеме. *Кесе планеталар. Эре планеталар.* / Ер. *Планетала иң-иң данлыҡлыһы, иң иркене беҙҙең тыуған ил.* Х. Ҡунаҡбаев. *Бөтә донъя беҙҙең илебеҙҙең Бөйөк Октябрь планета өҫтөнә күтәргән тыныслыҡ, азатлыҡ, гуманизм байрағын тағы ла юғарыраҡ күтәреүен күрә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 16 ғинуар.

**ПЛАНЕТА́РИЙ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Көмбәҙ кеүек экранда йондоҙло күк йөҙөн, Ҡояш, Ай, планеталар һәм башҡа күк есемдәренең хәрәкәтен күрһәтә торған аппарат.

**2.** Астрономия, космонавтика һәм Ер тураһындағы фәндәр буйынса популяр лекциялар ойоштороған ғилми-ағартыу учреждениеһы һәм ул урынлашҡан бина. *Мәскәү планетарийы.*

**ПЛАНИРО́ВКА** [*рус.*] *и.* Берәй нәмәнең төрлө өлөштәрен үҙ-ара урынлаштырыу тәртибе. *Ҡаланың планировкаһы.*

**ПЛА́НКА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Йышып шымартылған тар таҡта йәки металл пластинка.

◆ **Прицел планкаһы** винтовкала алыҫлыҡҡа ҡарап мәрәйлекте ҡуя торған ҡулайлама.

**ПЛАНКТО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. биол.* Һыу ҡатламдарында йәшәп, һыу ағымы менән күсеп йөрөгән үҫемлектәр һәм тереклек организмдары.

**ПЛАНЛАШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **планлаштырыу.** *Йәйгә планлаштырылған төҙөлөш эштәре. Ике айға планлаштырылған экспедиция.*

**ПЛАНЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Төҙөлә торған йорт ҡорамал кеүек нәмәнең планын йә проектын эшләү. *Яңы мәктәпте планлаштырыу.*

**2.** Билдәле бер йүнәлештәге эш сараларын һәм эш күләмен билдәләү. *Йәйгә экспедиция планлаштырыу.*

**3.** Яҙа йәки һөйләй торған нәмәнең эҙмәэҙлекле тәртибен, барышын билдәләү. *Үҙ ваҡытыңды планлаштырыу.*

**ПЛАНЛЫ** *с.* **1.** Планда ҡаралған. *Планлы эш.*

**2.** Билдәле бер планға мөнәсәбәтле. *Планлы төҙөлөш. Хужалыкты планлы рәүештә алып барыу.* ■ *Ҡапыл килеп тығылған төрлө эш тәртипле, планлы рәүештә эшләргә ирек бирмәй.* Ғ. Дәүләтшин.

**ПЛАНОВИ́К** [*рус.*] *и.* Эш пландары төҙөү өлкәһендә эшләгән белгес.

**ПЛАНТА́ТОР** [*рус.*] *и.* Плантация (1 мәғ.) хужаһы.

**ПЛАНТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ниндәйҙер махсус культура үҫтереү менән шөғөлләнгән капиталистик хужалыҡ.

2. Ниндәйҙер культура сәселгән ҙур майҙан. *Кукуруз плантацияһы. Сөгөлдөр плантацияһы.*

**ПЛАНШЕ́Т** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Өҫтән үтә күренмәле итеп, карта һалып йөрөү өсөн эшләнгән йоҡа сумка. *Планшеттан картаны алыу.*

**2.** *геод.* Ерҙең планын төшөрөү өсөн ҡағыҙ йәбәштереп яһаған таҡта.

**3.** *геод.* Планға һыҙылған геодезик күсермә.

**ПЛА́СТИК** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Йылытканда кәрәкле формаға еңел килеп, аҙаҡ шул форманы тотороҡло һаҡлай торған яһалма йәки тәбиғи полимер материал. *Каюталар төҫлө пластик менән матурланған.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 18 сентябрь.

**ПЛАСТИ́К** *с.* **1.** Пластикаға (1, 2 мәғ.) мөнәсәбәтле. / Тышҡы һүрәтләнештең асыҡлығы, килешлеге, күркәмлегенә мөнәсәбәтле; килешле, күркәм. *М. Назаровтың „Башҡорт ҡыҙы портреты" пластик яҡтан асыҡ, таҙа итеп эшләнгән.* „Совет Башҡортостаны", 1968, 5 ғинуар.

**2.** Күркәм, нәфис һәм ритмик хәрәкәт сәнғәтенә бәйле итеп башҡарылған; күркәм, нәфис. *Пластик гимнастика. Пластик танса.*

**3.** Баҫым тәьҫиренән төрлө тышҡы формаға килеп, баҫымды туҡтатҡандан һуң шул рәүешен һаҡлап тороуға һәләтле.

**4.** *мед.* Һау тирене ауыртҡан урынға күсереү эшенә мөнәсәбәтле. *Пластик хирургия. Пластик операция.*

◆ **Пластик масса** йылытканда кәрәкле формаға еңел килеп, шул формала тотороҡло торған яһалма йәки тәбиғи полимер материал.

**ПЛА́СТИКА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* **1.** Һынлы һүрәт яһау сәнғәте; скульптура. *Пластика мәктәбе.*

**2.** Кәүҙәләндерә торған есемдең, нәмәнең эскә төҙөлөшөнә сәбәп булараҡ күләмгә форманың бөтә яҡтан килешлеге, төҙөклөгө.

**3.** Хәрәкәттәрҙең үҙ-ара берҙәмлеге, самаға ярашлығы, уларҙың бөтә яҡтан килешлеге.

**ПЛАСТИКА́Т** [*рус.*] *и.* Пластик массаның эластик төрө.

**ПЛАСТИЛИ́Н** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Балсыҡ, балауыҙ, май ҡатнаштырып, ҡатмай торған итеп эшләнгән, эүәләп, уҡмаштырып низер яһау өсөн ҡулланылған пластик масса.

**ПЛАСТИ́НКА** [*рус.*] *и.* **1.** Ҡаты матдәнән эшләнгән йоҡа яҫы металл, быяла һ. б. киҫәге. *Быяла пластинка. Ҡорос пластинка.*

**2.** Уйнатыу өсөн тауыш яҙылған йоҡа диск. *Оҙаҡ уйнай торған пластинка. Йырҙы пластинкаға яҙыу.*

**3.** Фотоға төшөрөү өсөн яҡтылыҡҡа һиҙгер ҡатлауы булған быяла.

**ПЛАСТМА́ССА** [*рус.*] *и.* Пластик масса (*кар.* **пла́стик**). / *Пластмасса һауыт.* ■ *Төҫлө металдарҙы пластмасса менән алмаштырғанда деталдең үҙкиммәте күп тапҡырға кәмей.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 18 сентябрь.

**ПЛА́СТЫРЬ** [*рус.* ⟨*лат.* ⟨*гр.*] *и.* Йәбешеп торған дарыулы сепрәк (яраға, шешеккә йәбештерелә).

**ПЛА́ТИНА** [*рус.* ⟨*исп.*] *и.* Химик элемент, бик еңел сүкелә һәм һыҙыла торған һорғолт аҡ төҫтәге аҫыл металл (электр һәм радиотехникала, ювелир эшендә һ. б. ҡулланыла).

**ПЛАТФО́РМА** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Ҡаты материалдан эшләнгән тигеҙ ҡалҡыу майҙансыҡ.

**2.** Станциялағы тимер юлды буйлатып эшләгән ҡалҡыу майҙан. *Станцияның платформалары буш ине.* Б. Бикбай. / Бәләкәй тимер юл станцияһы.

**3.** Тәпәшәк ситле асыҡ йөк вагоны. *Машиналарҙы платформаға тейәү.*

**4.** Берәй партия, төркөм, йәмәғәт ойошмаһының эш итеү программаһы, ҡараштар, политик талаптар системаһы. *Партияның һайлау платформаһы.*

**ПЛАФО́Н** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Түбә таҡтаһына йәки стенаға ҡуйыла торған шәм ҡалпағы. *Түңәрәк плафон.*

**ПЛАЦ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и. хәрби* Хәрби занятиелар һәм парад майҙаны. *Полктың казармалағы бөтә подразделениеларын плацҡа теҙҙеләр.* Ғ. Ибраһимов.

**ПЛАЦДА́РМ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Хәрби операция әҙерләнә һәм башҡарыла торған арауыҡ. *Дошмандың өс ҡатлы оборона һыҙығын емереп, Выморка тигән утар янына сыҡҡас, Кусимов плацдармды ике яҡлап киңәйтергә тотондо.* К. Мәргән. / Хәрби хәрәкәт башлау өсөн сығанаҡ булып ер.

**ПЛАЦКАРТ** [*рус.* плацкарта ⟨*нем.*] *и.* Билетҡа ҡушып, вагондағы урынды билдәләү өсөн бирелә торған квитанция йәки өҫтәмә билет.

**ПЛАЦКАРТЛЫ** *с.* Плацкарт буйынса урыны билдәле. *Плацкартлы билет.* / Плацкарт буйынса бирелә торған. *Плацкартлы вагон. Плацкартлы урын.*

**ПЛАЩ**[1] [*рус.*] *и.* Ямғыр үткәрмәй торған пальто. *Өҫтөнә ҡыҙыл плащ, башына бурҙат берет кейгән .. бер ҡатын шап-шап атлап килде.* М. Тажи.

**ПЛАЩ-ПАЛА́ТКА** [*рус.*] *и.* Плащ итеп кейеп тә, палатка итеп тә булған ямғыр үткәрмәй торған еңһеҙ кейем.

**ПЛЕБЕ́Й** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. тар.* Боронғо Римдағы иң түбән ҡатлам вәкиле.

**ПЛЕБИСЦИ́Т** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** *тар.* Боронғо Римда плебейҙар йыйылышында ҡабул ителә торған ҡарар.

**2.** Мөһим дәүләт мәсьәләһен хәл итеү өсөн үткәрелгән бөтә халыҡ тауышын йыйыу сараһы. *Плебисцит үткәреү.*

**ПЛЁВРА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. анат.* Үпкәне һәм күкрәк ситлеген ҡаплаған яры. *Плевра ҡыуышлығы.*

**ПЛЕВРИ́Т** [*рус.*] *и.* Плевра шеше. *Ҡоро плеврит.*

**ПЛЕД** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Шаҡмаҡлы тығыҙ йөн туҡыманан ғәҙәттә сәскәле итеп эшләнгән шәл, япма.

**ПЛЕЗИОЗА́ВР** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Оҙон муйынлы, бәләкәй башлы, ҙур йөҙгөс аяҡлы ҡаҙылдыҡ диңгеҙ һөйрәлеүселәре төрө.

**ПЛЕКСИГЛА́С** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Үтә күренмәле ҡаты материал; органик быяла.

**ПЛЕН** [*рус.*] *и.* Хәрби дошман ҡулындағы тотҡонлоҡ; әсир, әсирлек. *Пленға алыу. Пленға төшөү.*

◆ **Плен алыш** йәштәр уйыны (ике саф булып теҙеләләр ҙә, алмаш-тилмәш уртаға сығып,

йырлап-бейеп, ҡаршы яҡтағы кешеләрҙе берәм-берәм үҙ янына әүрәтеп алалар; кем күберәк әүрәтә — шул еңә).

**ПЛЕНАР** [*рус.* пленарный ⟨*лат.*] *с.* Һайлап ҡуйылған бөтә ағзалары ҡатнашлығында үткәрелә торған. *Пленар ултырыш.*

**ПЛЁНКА** [*рус.*] *и.* **1.** Фотоға һәм киноға төшөрә торған махсус таҫма. *Фотоаппарат плёнкаһы.*

**2.** Синтетик полимерҙан эшләнгән үтә күренмәле материал.

**ПЛЕНУМ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Пленар ултырыш. *Үҙәк комитет пленумы.*

**ПЛЕЯДА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кит.* Бер үк осорҙа бер өлкәлә эшләгән таныҡлы кешеләр төркөмө. *Треста танылған төҙөүселәр плеядаһы барлыҡҡа килде.* „Ағиҙел", 1966, № 3.

**ПЛИНТУС** [рус. ⟨ *гр.*] *и.* Стена буйлатып иҙәнгә ҡағылған өс ҡырлы тар планка.

**ПЛИС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Эре ептән бәрхәткә оҡшатып, өбөрөләп һуҡҡан туҡыма. *Плистан тегеү. // Плис елән. Плис кәзәкей.*

**ПЛИССЕ** [*рус.* ⟨ *фр.*]. Материялағы махсус эшкәртеп йәки үтекләп эшләнгән ваҡ ҡына буй-буй һыр. *Ягалағы плиссе. Плиссе яһау.* ■ *[Рәйсә:] Ул ниндәй портниха инде, плиссе менән гофрировканы ла айырмағас.* Һ. Дәүләтшина.

**ПЛИССЕЛЫ** *с.* Плиссеһы булған, плиссе яһалған. *Плисселы итәк.*

**ПЛИТА** [*рус.*] *и.* **1.** Өҫтө тигеҙ ҙур яҫы таш йәки металл киҫәге. *Бетон плита. Керамик плита. Мәрмәр плита.*

**2.** Өҫтөнә суйын, кәстрүль ултыртып бешерә торған мейес. *Газ плитаһы.* ■ *[Маруся] суйын сүлмәктәрҙе, кәстрүлдәрҙе .. плита өҫтөнә күсерә һалып, аштарҙың бешкәнен ҡарай.* Һ. Дәүләтшина.

**ПЛИТКА** [*рус.*] *и.* Пресланған бәләкәй генә яҫы дүрткел нәмә. *Бер плитка шоколад.*

◆ **Электр плиткаһы** өҫтөнә һауыт ултыртып, аш-һыу әҙерләү өсөн булған, электр менән эҫетелә торған прибор. *Плиткала сәй ҡайнатыу.*

**ПЛИТӘ** [*рус.* плита] *и. һөйл. ҡар.* **плита** 2.

**ПЛОМБА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Келәймә һуғып, бикле ишеккә тағылған ҡурғаш йәки башҡа нәмә киҫәге. *Пломбаны алыу.* ■ *Магазинды ябып йоҙаҡланылар ҙа пломба һуҡтылар.* С. Агиш.

**2.** Теш соҡорона һалынған ҡаты матдә. *Тешкә пломба һалыу.*

**ПЛОМБАЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **пломбалау.** *Пломбаланған бина. Пломбаланған теш.*

**ПЛОМБАЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **пломбалау.**

**ПЛОМБАЛАУ** *к.* **1.** Пломба (1 мәғ.) һуғыу. *Вагонды пломбалау.*

**2.** Тешкә пломба һалыу. *Теште пломбалау.*

**ПЛОМБАЛЫ** *с.* **1.** Пломба (1 мәғ.) һуғылы. *Пломбалы вагон.*

**2.** Пломба һалыулы *(тешкә ҡарата*].

**ПЛОМБИР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Төрлө емеш, һут ҡушып, ҡаймаҡтан эшләнгән туңдырма.

**ПЛОТИНА** [*рус.*] *и.* Һыуҙың кимәлен күтәреү өсөн уның ағышын, хәрәкәтен көйләп торған ҡоролма. *Бетон плотина. Шлюзлы плотина.*

**ПЛУТОКРАТИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кит.* Иң бай юғары ҡатлам вәкилдәренең хакимлегенә нигеҙләнгән политик ҡоролош.

**ПЛУТОН** [*рус.* ⟨ *лат.*] (*баш хәреф менән*) *и.* **1.** Боронғо Рим мифологияһында ер аҫты батшалығы аллаһы.

**2.** *астр.* Ҡояш системаһында Ҡояштан иҫәпләгәндә туғыҙынсы торған планета.

**ПЛУТОНИЙ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Радиоактив сифаты булған яһалма химик элемент.

**ПЛЮС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *мат.* Ҡушыу ғәмәлен һәм ыңғай һанды белдергән тамға (+); *киреһе* минус. *Плюс ҡуйыу.*

**2.** Һауа һәм һыу температураһының нулдән юғары булыуын күрһәтеү өсөн ҡулланыла.

**3.** *күсм.* Ыңғай, яҡшы яҡ. *Һәр яҡлап ориентация яһау һәм бөтә плюстарҙы, минустарҙы иҫәпкә алыу кәрәк.* «Әҙәби Башҡортостан», 1950, № 1.

**ПЛЮШ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Өбөрөһө бәрхәттекенән оҙонораҡ, һирәгерәк итеп һуғылған йомшаҡ туҡыма. *Плюш менән көпләнгән диван. // Плюш пальто. Плюш яға.*

**ПЛЯЖ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Һыу инә, ҡыҙына торған урын. *Диңгеҙ пляжы. Пляж костюмы.*

**ПНЕВМАТИК** *с.* Ҡыҫылған һауа менән хәрәкәткә килтерелә торған. *Пневматик мылтыҡ. Пневматик сүкеш.*

**ПНЕВМАТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. йыйн.* Пневматик механизмдар, ҡулайламалар.

**ПНЕВМОНИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Үпкә шешеүе.

**ПОБЕДИТ** [*рус.*] *и.* Вольфрам ҡатыш бик ҡаты иретмә. *Ҡырҡҡысты победиттан яһау. // Победит ҡасау. Победит пластинка.*

**ПОВАР** [*рус.*] *и. ҡар.* **ашнаҡсы.**

**ПОВЕСТКА** [*рус.*] *и.* Ҡайҙалыр саҡырыу хаҡында ҡыҫҡа ғына яҙма хәбәр. *Шул [һуғыш башланған] көндө үк ҡорҙаштарымдың күбеһенә повестка килде.* С. Кулибай.

**ПОВЕСТЬ** [*рус.*] *и.* Романға ҡарағанда йөк мәткеһе ябайыраҡ, бәләкәйерәк булған әҙәби әҫәр. *Тарихи повесть. Повесть яҙыу.*

**ПОВИДЛО** [*рус.*] *и.* Емеште үткәреп, шәкәр ҙә ҡайнатҡан ҡуйы масса. *Алма повидлоһы.*

**ПОВОЗКА** [*рус.*] *и. ҡар.* **арба.** *Васяның әсәһе пар атлы повозка күҙҙән юғалғансы ҡарап ҡалды.* Һ. Дәүләтшина.

**ПОГОН** [1] [*рус.*] *и.* Дүрткелләп, ҡаймалап тегеп, формалы кейемдең яурынына баҫа торған айырыу билдәһе. *Уҡалы погон. Офицер погоны. Һалдат погоны.*

**ПОГОН** [2] [*рус.* погонный] *с.* Дөйөм оҙонлоҡҡа һалыулы (үлсәмгә ҡарата). *Погон метр.*

**ПОГРАНИЧНИК** [*рус.*] *и.* Сик һаҡлауға тәғәйенләнгән ғәскәрҙең хәрби хеҙмәткәре. *Пограничниктар формаһы.*

**ПОГРОМ** [*рус.*] *и.* Ниндәй ҙә булһа бер милли йәки башҡа төрлө төркөмдө үлтереү, ҡырыу талау өсөн ойошторолған реакцион-шовинистик сығыш.

**ПОГРОМСЫ** *и.* Погромда ҡатнашҡан йәки погром ойошторған кеше.

**ПОДАГРА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тәндә матдәләр алмашыныуы боҙолоп, быуын йәки туҡымалар ҙа тоҙ ултырыуҙан килгән ауырыу.

**ПОДБО́РКА** [*рус.*] *и.* Дөйөм темаға арналып, газетала, журналда бер баш аҫтында бирелгән мәҡәләләр, корреспонденциялар төркөмө.

**ПОДВА́Л** [*рус.*] *и.* **1.** Йорттоң ер кимәленән түбәндәге аҫҡы ҡаты.

**2.** Газета битенең түбәндәге өлөшө һәм шунда урынлаштырылған мәҡәлә.

**ПО́ДВИГ** [*рус.*] *и. кар.* **батырлыҡ.**

**ПО́ДДАННЫЙ** [*рус.*] *и.* Берәй дәүләт подданствоһындағы кеше.

**ПО́ДДАНСТВО** [*рус.*] *и.* Кешенең берәй дәүләттең даими халҡына ҡарағанлығы. *Сит ил подданствоһы. Подданство ҡабул итеү.*

**ПОДОХОД** [*рус.* подоходный] *с.* Доход размерына ярашлы тәғәйенләнгән, түләтелгән. *Подоход һалым.*

**ПОДПИ́СКА** [*рус.*] *и.* **1.** Кешенең квитанция тултырып, аҡса түләп, газета, журналға һ. б. яҙылыуы. *Подписка үткәреү.* / Баҫма нәмәләрҙе өйгә килтереүгә, ебәреүгә булған килешеү, шарт. *Подписка буйынса журнал алдырыу.*

**2.** Ниҙер хаҡындағы яҙма йөкләмә. *Йәшәгән урындан китмәҫкә подписка биреү.*

**ПОДПИ́СЧИК** [*рус.*] *и.* Газета, журналға һ. б. яҙылған кеше. *Журналдың даими подписчиктары.*

**ПО́ДПИСЬ** [*рус.*] *и. кар.* **ҡултамға.**

**ПОДПОЛКО́ВНИК** [*рус.*] *и.* Майорҙан юғарғы офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше.

**ПОДПО́ЛЬЕ** [*рус.*] *и.* Хөкүмәткә ҡаршы йүнәлтелгән нык йәшерен эш шарты һәм шул шарттағы тормош. *Подпольела эшләү.*

**ПОДПО́ЛЬЩИК** [*рус.*] *и.* Подполье шарттарында эшләгән кеше.

**ПОДПОРУ́ЧИК** [*рус.*] *и.* Революцияға тиклемге армияла прапорщиктан юғарғы, түбәндән икенсе баҫҡыстағы офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше.

**ПОДПРА́ПОРЩИК** [*рус.*] *и.* Революцияға тиклемге армияла кесе команда составындағы юғарғы дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше. *[Суров:] Һинең дә, минең дә һуҡтырылыу, һуғылыу көндәре алда әле, подпрапорщик әфәнде. Унтерҙан күтәрелеүеңә бер ай юҡ, розга тураһында һөйләйһең.* А. Таһиров.

**ПОДРАЗДЕЛЕ́НИЕ** [*рус.*] *и.* **1.** Ғәскәри бүлем эсендәге бәләкәйерәк берәмек (полкта — батальон, батальонда — рота һ. б.).

**2.** *кар.* **берәмек.** *Колхоз хеҙмәт подразделениелары.*

**ПОДРЯ́Д** [*рус.*] *и.* Билдәле бер хаҡ менән билдәле бер эш башҡарыуға алынған йөкләмә һәм шул йөкләмә буйынса башҡарылған эш. *Подрядҡа алыу. Подрядҡа биреү. Подряд буйынса эшләү. Подряд ойошмалары. Подряд ысулы.* ■ *Бригада подрядында эшләү һөҙөмтәһендә хеҙмәт етештереүсәнлегә күтәрелде, тәртип һәм башҡарыу дисциплинаһы яҡшырҙы.* „Совет Башҡортостаны“, 1986, 29 ғинуар.

**ПОДРЯДСЫ** *и.* Подряд буйынса эш башҡарған кеше йә ойошма.

**ПОДСТА́НЦИЯ** [*рус.*] *и.* Электр тоғын юғары вольтлы оло сымдан алып, айырым урындарға оҙатып торған аралашсы станция.

**ПОДФА́РНИК** [*рус.*] *и.* Машинаның фараһы эргәһендәге бәләкәй фонарь; быҙлауыҡ.

**ПОДШИ́ВКА** [*рус.*] *и.* Тәртип буйынса һалып тегелгән газета, документ төргәге. *Газета подшивкаһы. Журнал подшивкаһы.*

**ПОДШИ́ПНИК** [*рус.*] *и.* Төрлө машина, механизм, прибор һәм башҡа әйләнманың әйләнеп торған өлөшө менән шуның көсәре араһына ҡуйылған терәк дүңгәләге. *Шариклы подшипник. Роликлы подшипник.*

**ПОДЪЁЗД** [*рус.*] *и.* Бинаға инә торған ер. *Беҙҙең йорт һигеҙ генә квартиралы. Ике генә подъезы бар.* Р. Низамов.

**ПО́ЕЗД** [*рус.*] *и.* Локомотивҡа тағылған вагондар теҙмәһе. *Етеҙ поезд. Пассажир поезы. Алыҫ ара поезы. Яҡын ара поезы.* ■ *Ун биш көн инде беҙ тимер юлда сәйәхәт итәбеҙ. Поездан поезға ултырабыҙ.* Д. Юлтый.

**ПОЖА́Р** [*рус.*] *и. кар.* ут [1] 3.

**ПОЖА́РКА** [*рус.*] *и. һөйл.* Ут һүндерә торған ҡорал-ҡорамал менән тәьмин ителгән бина.

**ПОЖА́РНИК** [*рус.*] *и. һөйл.* Янғын һүндереү командаһындағы кеше.

**ПО́ЗА** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Кәүҙә торошо; торош.

**ПОЗИТИ́В** [1] [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Төҫ, килеше ысынға тап килгән фото һүрәте.

**ПОЗИТИВ** [2] [*рус.* позитивный] *с. кит.* Ыңғай. *Позитив күренеш. Позитив фекер.*

**ПОЗИТИВИ́ЗМ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Ысынбарлыҡтың асылын белеү мөмкинлеген кире ҡағып, фәндең әһәмиәтен күҙәтеүселек эше менән генә сикләгән идеалистик философия йүнәлеше.

**ПОЗИТИ́ВИСТ** [*рус.*] *и.* Позитивизм яҡлы кеше.

**ПОЗИТИВИСТИК** *с.* Позитивизмға мөнәсәбәтле. *Позитивистик ҡараш.*

**ПОЗИТРО́Н** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. физ.* Электрон массаһына һәм ыңғай зарядҡа эйә булған материаль өлөшсә.

**ПОЗИ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Кемдең йәки нимәнеңдер торған урыны, торошо.

**2.** Һуғыш ҡырында ғәскәр торған урын. *Алғы позиция. Артҡы позиция. Дошман позицияһы.* ■ *Яңы позицияға күстек. Яңы бойороҡ та бар. Йәнә һөжүмгә күсәбеҙ.* С. Әлибаев. *[Һалдаттар] уңайлы позиция һайлап өлгөрмәнеләр, йөҙ йәшәр ҡарағайҙарҙы шырпылай һынрып, яҡындағы ҡалҡыулыҡтан дүрткел броналы „тигр“ килеп сыҡты, уның артынан тиҫтәләгән еңел танк күренде.* „Совет Башҡортостаны“, 1986, 28 ғинуар.

**3.** *күсм.* Берәй мәсьәләгә ҡарата тотҡан ҡараш, мөнәсәбәт. *Беҙҙең шарттарҙа диндең позицияһы нык ҡаҡшаны.* „Ағиҙел“, 1968, № 10. *Шағирҙың юғары гражданлыҡ пафосы менән һуғарылған әҫәрҙәрендә заман һулышы, авторҙың актив тормош позицияһы, тәрән философияһы асыҡ сағылыш таба.* „Совет Башҡортостаны“, 1986, 25 ғинуар.

**ПОКРЫ́ШКА** [*рус.*] *и.* Машина тәгәрмәсенең камераһы өҫтөнән кейҙерелгән ҡалын көп. *Тәгәрмәс покрышкаһы таш юлда нык ашала.* М. Фәрреахов. / Тын тултырмалы туптың камераһы өҫтөнән кейҙерелә торған күн көп. *Волейбол тубының покрышкаһы.*

**ПОЛЕВО́Д** [*рус.*] *и.* Баҫыусылыҡ буйынса белгес.

**ПОЛЕМИК** *с.* Полемикаға хас, полемикаға ҡороулы. *Полемик мәҡәлә.*

**ПОЛЕ́МИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Берәй мәсьәлә буйынса фекер алышҡанда булған бәхәс. *Әҙәби полемика. Полемика алып барыу.*

**ПОЛИАМИ́Д** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. физ., хим.* Үтә ныҡ һәм эластик булып, унан эшләнгән нәмәләр промышленноста һәм көнкүрештә киң ҡулланыу тапҡан синтетик полимер.

**ПОЛИА́НДРИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кит.* Бер ҡатындың бер юлы бер нисә ир менән тороуы; күп ирлелек.

**ПОЛИАРТРИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Быуындарҙың бер юлы йәки эҙмә-эҙлекле һыҙлауы.

**ПОЛИГА́МИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *кит.* Бер ирҙең йәки ҡатындың бер юлы бер нисә ҡатын йәки ир менән тороуы; күп никахлылыҡ.

**2.** Бер сезон эсендә бер иркәк йәнлек менән бер нисә инә йәнлек араһындағы енси мөнәсәбәт.

**ПОЛИГИНИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кит.* Бер ирҙең бер юлы бер нисәҡатын менән тороуы; күп ҡатынлылыҡ.

**ПОЛИГЛО́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Күп тел белгән кеше.

**ПОЛИГО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Атырға өйрәнә йәки яңы ҡоралды һынай торған урын.

**ПОЛИГРАФИК** *с.* Полиграфияға мөнәсәбәтле. *Газетаның полиграфик эшләнеше.*

**ПОЛИГРАФИ́СТ** [*рус.*]. *и.* Полиграфия эшсеһе.

**ПОЛИГРАФИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Баҫма продукция етештереүҙең бөтә төрөн үҙ эсенә алған техника тармағы, промышленность. *Полиграфия комбинаты.*

**ПОЛИКЛИ́НИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ауырып ятҡан йәки килгән кешегә кәрәкле медицина ярҙамы күрһәтә торған ойошма.

**ПОЛИМЕ́Р** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. физ., хим.* Күп тапҡыр ҡабатланған быуындарҙан торған, сылбыр рәүешендә төҙөлгән молекулалы матдә. *Тәбиғи полимерҙар.* / Полимер берләшмә. *Полимер материал.*

**ПОЛИМЕРИЗА́ЦИЯ** [*рус.*] *и. хим.* Полимер алыу процесы.

**ПОЛИМЕРЛАШТЫРЫУ** *к.* Түбән молекуляр берләшмәне юғары молекуляр берләшмәгә әүерелдереү.

**ПОЛИМЕ́РЛАШЫУ** *к.* Түбән молекуляр берләшмәнән юғары молекуляр берләшмәгә әүерелеү; полимерға әүерелеү.

**ПОЛИМЕТАЛЛЫК** *с.* Бер нисе металды эсенә алған (рудаға ҡарата).

**ПОЛИМОРФИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Бер үк төргә ҡараған хайуандар йәки үҫемлектәр араһында бер-береНән ҡырҡа айырыла торған формаларҙың булыуы. *Енси полиморфизм.*

**2.** *хим.* Бер үк матдәнең төрлө формала кристаллашыуға һәләтлеге. *Көкөрттөң полиморфизмы.*

**ПОЛИНЕЗИ́Й** *и.* Тын океан утрауҙарының (Полинезияның, Меланезияның ҡайһы бер утрауҙарының) төп халҡы һәм шул халыҡтарҙың бер кешеһе. *Полинезий халҡы. Полинезий телдәре.*

**ПОЛИОМИЕЛИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Арҡа мейеһенең параличҡа килтерә торған ҡаты йоғошло ауырыуы.

**ПОЛИ́П** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Һыу төбөндәге ташҡа йәбешеп йәшәй торған ябай тереклек. *Коралл полибы. Сөсө һыу полибы.*

**2.** Тиресәгә шешек һымаҡ булып үҫә торған ит. *Ашҡаҙан полибы. Танау полибы.*

**ПОЛИРО́ВКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Нәмәнең ышҡып шымартылған, ялтыратылған йөҙө. *Полировка яһау.*

**ПОЛИРОВКАЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **полировкалау.**

**ПОЛИРОВКАЛАУ** *к.* Ниҙелер ышҡып, шымартыу, полировкалы итеү. *Мебелде полировкалау.*

**ПОЛИРОВКАЛЫ** *с.* Ышҡып, шымартылған, полировкаһы булған. *Полировкалы өҫтәл.*

**ПОЛИРО́ВЩИК** [*рус.*] *и.* Полировка яһау оҫтаһы.

**ПОЛИСЕМИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. лингв.* Бер һүҙҙең бер нисә мәғәнәлә ҡулланылышы; күп мәғәнәлелек.

**ПОЛИСИНТЕТИК** [*рус.* полисинтетический ⟨ *гр*]: **полисинтетик телдәр** һүҙ бәйләнешенә инген һүҙҙәрҙе бер морфологик берәмеккә берләштереү юлы менән бәйләй торған телдәр.

**ПОЛИСМЕ́Н** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Англияла, АҠШ-та һәм ҡайһы бер башҡа илдәрҙә полицей.

**ПОЛИСТИРО́Л** [*рус.*] *и. махс.* Изоляторлыҡ сифаты булған синтетик полимер [промышленноста, көнкүрештә киң ҡулланыла].

**ПОЛИТБҮЛЕК** *и.* Политик бүлек. / Армияла, флотта, ҡайһы бер ведомстволарҙа етәкселекте һәм политик эште көсәйтеү өсөн КПСС Үҙәк Комитеты тарафынан төҙөлгән политик орган. *Шәһит Хоҙайбирҙинды Көнсығыш фронтындағы 5-се армияның политбүлегенә эшкә ҡалдыралар.* Р. Ҡуҙыев.

**ПОЛИТБЮРО́** [*рус.*] *и.* КПСС Үҙәк Комитетының политик бюроһы, Советтар Союзы Коммунистар партияһының етәксе органы.

**ПОЛИТЕИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Алланың бер түгел, күп булыуын таныған дин.

**ПОЛИТЕИ́СТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Политеизм яҡлы кеше.

**ПОЛИТЕХНИК** *с.* **1.** Техниканың төрлө тармағын өйрәнеү һәм ҡулланыу эшенә бәйле. *Политехник институт.*

**2.** Производствоның мөһим тармаҡтарын теоретик һәм практик йәһәттән өйрәнеүгә нигеҙле. *Политехник белем.*

**ПОЛИ́ТИК** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Политика менән шөғөлләнгән кеше, политик эшмәкәр. *Прогрессив политик. Буржуаз политиктар.*

**ПОЛИТИК** *с.* **1.** Политикаға (1, 2 мәғ.) бәйле. *Политик агитация. Массаларҙың политик активлығы. Политик күҙәтеүсе.* ■ *Именлекте тәьмин итеү торған һайын политик бурыс булып килеп баҫа, һәм уны тик политик саралар менән хәл итергә мөмкин.* „Совет Башҡортостаны“, 1986, 26 февраль.

**2.** Политиканы (1 мәғ.) тормошҡа, ғәмәлгә ашырған. *Политик партия. Политик эшмәкәр.*

**3.** Дәүләт, хоҡуҡ принциптарына бәйле. *Политик королош. Политик режим. Политик власть. Политик система.* ■ *Халыҡ дәүләт власын Башҡорт АССР-ының политик нигеҙен тәшкил итеүсе халыҡ депутаттары Советтары аша гәмәлгә ашыра.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**4.** Дәүләт политикаһын, дәүләттәге йәшәп килгән королош нигеҙен ҡаҡшатыу менән бәйле. *Политик енәйәт.*

**ПОЛИ́ТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Дәүләт, партия йәки ижтимағи төркөмдөң эске дәүләт идара һәм халыҡ-ара мөнәсәбәттәр өлкәһендә шул власть, партия, төркөм мәнфәғәттәре менән билдәләнгән эшмәкәрлеге. *Совет дәүләтенең тыныслыҡ политикаһын беҙ киләсәктә лә удар хеҙмәт менән нығытасаҡбыҙ.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 21 ғинуар.

**2.** Эске һәм тышҡы ижтимағи тормошта булған ваҡиға ғәм мәсьәләләр. *Агымдагы политика. Политиканы белеү.*

**3.** *һөйл.* Кешенең ниндәйҙер маҡсатҡа йүнәлтелгән йәки мөнәсәбәтен билдәләгән эшҡылыгы. *Волоска старшина һайларга бер йыл калды тигәс тә, ул [Ныязгол] бөтә политикаһын, осталыгын юлга һалып, һигеҙ ауылдан йыйыласаҡ һайлаусы кешеләрҙе, мирәйеттәрҙе уҙ ягына ауҙарырга тырышты.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Яңы экономик политика** капитализмдан күсеү осоронда пролетариат диктатураһының үҫешенең тәүге этабында дәүләт ҡулында тотҡан хәлдә халыҡ хужалығын тиҙ аяҡҡа баҫтырыу һәм уны социалистик үҙгәртеп ҡороуҙы тәьмин итеү маҡсатында ҡайһы бер капиталистик элементтарҙың үҫешен һәм ирекле сауҙаны рөхсәт итеүҙән торған хужалыҡ политикаһы.

**ПОЛИТИКА́Н** [*рус.*] *и. яманл.* Үҙ маҡсатына ирешеү өсөн бер саранан да тартынмаған принципһыҙ политик.

**ПОЛИТИК-МАССАУИ** [*рус.* политико-массовый]: **политик-массауи эш** киң халыҡ араһында үткәрелгән политик эш.

**ПОЛИТИНФОРМА́ТОР** [*рус.*] *и.* Эске һәм халыҡ-ара хәлдәр тураһында информация үткәргән кеше.

**ПОЛИТИНФОРМА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Эске һәм халыҡ-ара хәлдәр тураһында яһалған информация.

**ПОЛИТРАБО́ТНИК** [*рус.*] *и.* Совет Армияһы һәм Флотында политик эш алып барған кеше.

**ПОЛИТРУ́К** [*рус.*] *и.* Политик эшкә етәкселек итеп, ғәскәри подразделениеларҙың хәрби һәм политик әҙерлеге өсөн командир менән бер кимәлдә яуап биргән кеше (1919—1942 йылдарҙа булған). *Рота политругы.*

**ПОЛИТСОСТА́В** [*рус.*] *и.* Совет Армияһы һәм Флотындағы хәрби-политик хеҙмәткәрҙәр составы.

**ПОЛИТЭКОНО́МИЯ** [*рус.*] *и.* Йәмғиәт үҫешенең төрлө баҫҡысындағы ижтимағи хеҙмәтте ойоштороу һәм материаль байлыҡты бүлеү закондарын өйрәнә торған фән.

**ПОЛИЦЕ́Й** [*рус.* полицейский] *и.* Полицияла хеҙмәт иткән кеше.

**ПОЛИЦЕ́ЙСКИЙ** [*рус.*] *и. ҡар.* **полицей.**

**ПОЛИ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Революцияға тиклемге Россияла һәм капиталистик илдәрҙә ғәмәлдәге дәүләт королошон һәм уның эске тәртибен һаҡлау, революцион хәрәкәткә ҡаршы көрәшеү өсөн хеҙмәт иткән махсус орган һәм уның ғәскәре. *Полиция бүлеге.* / *һөйл.* Шул орган урынлашҡан бина.

**2.** Полицейҙар төркөмө һәм шул төркөмдөң бер кешеһе. *Бер нисә атлы полиция ҡамсы менән эшселәргә һөжүм итә башланы.* Д. Юлтый.

**ПОЛИЦМЕ́ЙСТЕР** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Революцияға тиклемге Россияла һәм ҡайһы бер капиталистик илдәрҙә ҡала полицияһының башлығы.

**ПОЛИЭТИЛЕ́Н** [*рус.*] *и.* Промышленность һәм көнкүреш нәмәләре етештереү өсөн ҡулланылған юғары ныҡлыҡтағы эластик синтетик полимер. *Съезд асылыу көнөнә химиктар пландан тыш 60 тонна полиэтилен, 80 тонна этил спирты эшләп сыгарырга йөкләмә алды.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 28 ғинуар.

**ПОЛК** [*рус.*] *и.* Дивизия йәки бригада составындағы үҙаллы ғәскәри берәмек. *Гвардия полкы. Кавалерия полкы. Пехота полкы. Полк байрагы. Полк командиры.* ■ *Бөйөк Ватан һугышында Таһир Кусимов Башкорт атлы кавалерия дивизияһында полкка етәкселек итә.* Ә. Гәрәев.

**ПОЛКО́ВНИК** [*рус.*] *и.* Подполковниктан юғарғы офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше.

**ПОЛКОВО́ДЕЦ** [*рус.*] *и.* Эре ғәскәри берәмеккә, флотҡа командалыҡ иткән эшмәкәр; хәрби етәксе.

**ПОЛКТАШ** *и.* Бер полкта хеҙмәт иткән кешеләр (бер-береһенә ҡарата). *Оҙакламай полкташтар .. бөтә фронт буйынса яңы һөжүмгә китте.* Ғ. Ибраһимов.

**ПОЛНОМО́ЧИЕ** [*рус.*] *и.* Кемгәлер берәү тарафынан бирелгән хоҡуҡ. *Башкорт АССР-ы Верховный Советы полномочиеларының срогы — биш йыл. Халыҡ депутаттарының урындагы Советтары полномочиеларының срогы — ике йыл ярым.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ПО́ЛОВЕЦ** [*рус.*] *и. ҡар.* **коман.**

**ПОЛОЖЕ́НИЕ** [*рус.*] *и.* **1.** Билдәле бер мәсьәләгә ҡараған ҡағиҙәләр, закондар йыйынтығы. *Һайлау тураһындагы положение.*

**2.** Берәй нәмәнең нигеҙендә ятҡан фекер. *Диалектик материализм положениелары.*

**ПОЛОНЕ́З** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Өс такттан торған тантаналы танса.

**2.** Шул танса ритмында яҙылған музыкаль әҫәр. *Шопен полонезы.*

**ПОЛОТНО́** [*рус.*] *и.* **1.** Ябай ысул менән һуғылған туҡыма. *Ебәк полотно. Киндер полотно.*

**2.** Художниктың ғәҙәттә киндергә төшөргән һүрәте. *Беҙҙең алда — ҙур полотно, полотно тулы халыҡ.* «Ағиҙел», 1969, № 6. / *ҡусм.* Тор-

мошто киң итеп һүрәтләгән әҙәби әҫәр. *Ҙур полотнолы әҫәр.*

3. *махс.* Ҡорал-ҡорамалдағы төрлө маҡсатҡа хеҙмәт иткән киң таҫма. *Комбайн полотноһы.*

4. Тимер, таш юлдың үтә, йөрөй торған ҡалҡыу өҫтө. *Тимер юл полотноһы.* ■ *Ҡеүәтле машина яңынан ҡуҙғалды,.. сүмес ерҙе актарып сығарып юл полотноһына бушатты.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 июнь.

**ПО́ЛЬКА** [*рус.* ‹ *чех.*] *и.* **1.** Ике такттан торған етеҙ танса.

2. Шул танса ритмында яҙылған музыкаль әҫәр.

**ПО́ЛЮС** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* **1.** Ер шарының фарази күсәре менән ер өҫтөнөң киҫешкән нөктәһе; ҡотоп. *Көньяк полюс.* ■ *Төньяк полюс уртаһында елберләй ҡыҙыл әләм* (Халыҡ йырынан). / Шул нөктә тирәһендәге урын. *Төньяк полюс экспедицияһы.*

2. *физ.* Электр теҙеме менән магниттағы ҡапма-ҡаршы ике остоң береһе. *Кире полюс. Ыңғай полюс.*

**ПОЛЯ́К** *и.* Польшаның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (славян телдәренең береһендә һөйләшә). *Поляк халҡы. Поляк ҡатыны. Поляк теле.*

**ПОЛЯКСА** *р.* **1.** Поляк телендә. *Полякса һөйләшеү.*

2. Поляктарға хас рәүештә. *Полякса кейенеү.*

**ПОЛЯР** [*рус.* полярный] *с.* **1.** Полюс тирәһендәге, полюстағы. *Поляр зона. Поляр утрауҙар.* **Поляр көн** Поляр түңәрәктә айлап ҡояш байымай торған ваҡыт (Көньяҡ ярымшар менән Төньяҡ ярымшарҙа төрлө ваҡытта алмашлап була). **Поляр төн** Поляр түңәрәктә айлап ҡояш ҡалҡмай торған ваҡыт (Көньяҡ ярымшар менән Төньяҡ ярымшарҙа төрлө ваҡытта алмашлап була). **Поляр түңәрәк** Төньяҡ һәм Көньяҡ ярымшарҙарҙың экваторҙан 66°32′-та ятҡан параллель һыҙығы (һыуыҡ бүлкәттең сиге). / Полюстағы, полюс тирәһендәге эшмәкәрлеккә мөнәсәбәтле. *Поляр станция. Поляр экспедиция.* / Ҡайһы бер зоология һәм ботаника терминдарының ҡушма өлөшө булып килә. *Поляр акула. Поляр кит.*

2. *физ.* Ыңғай һәм кире зарядтар булыуы менән бәйле. *Атомдарҙың поляр төркөмдәре. Поляр берләшмәләр.*

**ПОЛЯ́РНИК** [*рус.*] *и.* Поляр экспедицияла ҡатнашҡан кеше.

**ПОМЕ́СТЬЕ** [*рус.*] *и. кар.* **утар** 1.

**ПОМЕ́ЩИК** [*рус.*] *и. кар.* **алпауыт.**

**ПОМИДО́Р** [*рус.* ‹ *ит.*] **1.** Эт карағаты һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған баҡса үҫемлеге, йәшелсә. *Помидор түтәле. Помидор һабағы.*

2. Шул үҫемлектең ҡыҙыл булып өлгөрә торған йомшаҡ йәшелсәһе. *Йәшел помидор. Ҡыҙыл помидор. Маринадлы помидор. Тоҙло помидор. Помидор һуты.*

**ПО́НИ** [*рус.* ‹ *ингл.*] *и.* Бик бәләкәй тоҡомло ат.

**ПОНТО́Н** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* **1.** Һыу өҫтөндәге төрлө ҡоролманы күтәреү йәки һыу аша сығыу өсөн хеҙмәт иткән яҫы төплө кәмә. *Понтонлы күпер.*

2. Батҡан карапты күтәртә торған эсе ҡыуыш ҡулайлама.

**ПОП** [*рус.*] *и. һөйл.* Священник.

**ПОПЕЧИ́ТЕЛЬ** [*рус.*] *и.* Революцияға тиклемге Россияла: берәй ведомствоның учреждениелар селтәренә етәкселек иткән кеше.

**ПОПУГА́Й** [*рус.*] *и. кар.* **тутыйғош.**

**ПОПУЛЯР** [*рус.* популярный ‹ *лат.*] *с.* **1.** Ябай эстәлекле, һәр кем аңларлыҡ. *Популяр брошюра.*

2. Күп кеше яратҡан, таныҡлы. *Популяр артист. Популяр йыр.* / Ныҡ таралған, билдәле. *Популяр газета.*

**ПОПУЛЯРЛАШТЫРЫУ** *к.* Халыҡҡа таратыу, танытыу. *Яңы йырҙы популярлаштырыу.*

**ПОПУЛЯРЛАШЫУ** *к.* Популярлыҡ алыу, танылыу.

**ПОПУЛЯРЛЫҠ** *и.* Кемдең йәки ниҙеңдер халыҡ араһында билдәле булыуы, йәмәғәтселек тарафынан танылыуы. *Киң популярлыҡ менән файҙаланыу. Популярлыҡ ҡаҙаныу.* ■ *Шәһит Хоҙайбирҙин, Башҡортостандың политик тормошона 1917 йылдан башлап актив ҡатнашып, халыҡ араһында популярлыҡ ала.* Р. Ҡуҙыев.

**ПОПУРРИ́** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Берәй әҫәрҙең киң таралған көйҙәренән бер жанрҙың йәки билдәле бер композиторҙың бер нисә әҫәренән өҙөктәр алып төҙөлгән инструменталь музыка әҫәре.

**ПОРНОГРАФИК** *с.* Порнографияға ҡоролған. *Порнографик роман. Порнографик һүрәт.*

**ПОРНОГРА́ФИЯ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Енси мөнәсәбәтте һүрәтләүҙәге оятһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек.

**ПОРОЛО́Н** [*рус.*] *и.* Күҙәүле, тишекле синтетик материал.

**ПОРОШО́К** [*рус.*] *и.* **1.** Ваҡ итеп онталған матдә; онтаҡ. *Кер порошогы. Теш порошогы.*

2. Билдәле бер дозала онтаҡлап эшләнгән дарыу матдәһе. *Порошок эсеү.*

**ПОРТ** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Караптар туҡтап, бушатыла, тейәнә, ремонт үткәрә торған махсус урын. *Диңгеҙ порты. Йылға порты.* ■ *Портҡа пароход килеп туҡтаған. Бер йәш ҡыҙ атаһы шул пароходта ҡайтманымы икән, тип ҡаршы алырға төшкән.* С. Агиш. / Карап туҡтар урыны булған диңгеҙ буйы ҡалаһы.

**ПОРТА́Л** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* **1.** Ҙур йорттарҙың төрлө рәүештә матурлап эшләнгән тышҡы ишеге. *Колонналы портал.*

2. *тех.* П хәрефе рәүешендә булып, ҡайһы бер машиналарҙың өлөшөн тәшкил иткән рам.

**ПОРТАЛЛЫ** *с.* Портал (2 мәғ.) ҡуйылған, порталы бар. *Порталлы кран. Порталлы станок.*

**ПОРТАТИВ** [*рус.* портативный ‹ *фр.*] *с.* Бәләкәй күләмле, алып йөрөү өсөн йәтеш, ыҡсым. *Портатив магнитофон.*

**ПОРТВЕ́ЙН** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* Әсеп ултырған йөҙөмгә йәш коньяк спирты ҡушып яһаған көслө вино.

**ПО́РТИК** [*рус.* ‹ *лат.*] *и. кит.* Колонналар өҫтөндә эшләнгән япма (ғәҙәттә йорт алдында була); ҡыйыҡлы галерея.

**ПОРТЛЫ** *с.* Порты булған (кеше йәшәгән пунктҡа ҡарата). *Портлы ҡала.*

**ПОРТМОНЕТ** [*рус.* портмоне ⟨*фр.*] *и. иҫк.* Күндән эшләнгән бәләкәй аҡса янсығы; кәшәлүк.

**ПОРТРЕ́Т** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Кеше һүрәте. *Салауат Юлаев портреты.*

**2.** Әҙәби әҫәрҙәге персонаждың тышҡы күренешене яҙып биреүе.

**ПОРТРЕТСЫ** *и.* Портрет төшөрөү менән шөғөлләнгән рәссам.

**ПОРТСИГА́Р** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Папирос, сигарет һауыты. *Вәлиев сырт иттереп ялтыр портсигарын асты ла [Закирхановҡа] папирос тәҡдим итте.* С. Агиш.

**ПОРТУГАЛ** *и.* Португалияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (Һинд-Европа телдәренең береһендә һөйләшә). *Португал халҡы. Португал ҡатыны. Португал теле.*

**ПОРТУПЕ́Я** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Яурын аша һала йәки билгә быуа торған нәҙек ҡайыш (ҡорал тағыу өсөн).

**ПОРТФЕ́ЛЬ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Китап, ҡағыҙ һалып, ҡулға тотоп йөрөй торған тотҡалы сумка. *Күн портфель.*

**ПОРТЬЕР** [*рус.* портьера ⟨ *фр.*] *и.* Ҡалын тауарҙан эшләнгән ишек йә тәҙрә ҡормаһы.

**ПОРУ́КА** [*рус.*] *и. кар.* **яуаплылыҡ** 2. *Порукаға алыу. Порукаға биреү.*

**ПОРУЧЕ́НИЕ** [*рус.*] *и.* Ҡушылған эш; йомош. *Шәһит Хоҙайбирҙин Башҡортостан хөкүмәтенең поручениеһы менән урындарҙа булып, күп кенә яуаплы эш үтәне.* Р. Ҡузыев.

**ПОРУ́ЧИК** [*рус.*] *и.* Революцияға тиклемге армияла подпоручиктан юғарғы баҫҡыстағы офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше.

**ПОРФИ́Р** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Эре-эре кристалдары йылтырап торған вулкан тоҡомо.

**ПОРФИ́РА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Батшаларҙың ҡыҙылдан тегелгән тантаналы оҙон кейеме.

**ПО́РЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кар.* **өлөш.**

**ПОРШЕНЛЫ** *с.* Поршень ярҙамында эшләгән. *Поршенлы двигатель. Поршенлы насос.*

**ПО́РШЕНЬ** [*рус.*] *и.* Двигатель, насос, компрессор һ. б. машиналарҙың цилиндры эсендә йөрөгән бешкәк һымаҡ нәмә. *Поршень балдағы.*

**ПОСЁЛКА** [*рус.* посёлок] *и.* Ҡаланан йәки төп халыҡтан йыраҡ түгел кеше йәшәгән ҙур булмаған урын. *Эшселәр посёлкаһы.* ■ *Приискыларҙы уратып ултырған посёлкала алтын сығарыусылар һаны өс йөҙләп булып китте.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 25 апрель.

**ПОСО́БИЕ** [*рус.*] *и.* **1.** Аҡсалата күрһәтелгән ярҙам. *Пособие биреү. Пособие алыу.*

**2.** *кар.* **әсбап.**

**ПОСО́Л** [*рус.*] *и. кар.* **илсе** 1.

**ПОСО́ЛЬСТВО** [*рус.*] *и. кар.* **илселек.**

**ПОСТ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Ҡарауыл өсөн билдәләнгән урын; һаҡ. *Поска ҡуйыу. Поста тороу.* ■ *Кремлдә пост күп булған, әлбиттә. Ләкин Ленин квартираһы эргәһендәге 27-се пост иң мөһим, яуаплы, хөрмәтле постарҙың береһе һаналған.* Ә. Ихсан.

**2.** Ҡарауылға ҡуйылған бер йәки бер төркөм кеше; һаҡ. *Күҙәтеү посы.* ■ *Постарҙың беҙ парлап ҡайта инек һыҙылғанса таңдың яҡтыһы.* С. Кулибай.

**3.** Яуаплы урын, вазифа. *Директорлыҡ посы.*

**ПОСТАВЩИ́К** [*рус.*] *и.* Тейешле нәмә менән тәьмин итеп торған кеше йәки ойошма.

**ПОСТАМЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Һәйкәл, статуя кеүек нәмәне ҡуйыу өсөн эшләнгән ҡалҡыулыҡ; нигеҙ. *Бейек постаментҡа Яҡутовтың бюсы ҡуйылған.* З. Рафиҡов.

**ПОСТАНО́ВКА** [*рус.*] *и.* **1.** Сәхнә әҫәренең билдәле йөкмәтке һәм рәүеш менән үҙенә башҡа ҡуйылышы. *Дауыт Юлтыйҙың «Ҡарагол», Афзал Таһировтың «Алатау» пьесалары Мәһәҙиев постановкаһында донъя күрҙе.* «Ағиҙел», 1968, № 5.

**2.** Әҙерләп күрһәтелгән сәхнә тамашаһы.

**ПОСТОЯ́ЛЫЙ** [*рус.*]: **постоялый двор** *иҫк.* ат-арба ҡуя, ашай-эсә торған урыны булған юлсы-юлаусылар йорто; каруанһарай. [*Тимер*] *ҡалала, ауылдаштар тап булмаҫмы, тип, постоялый дворҙы йөрөп сыҡты.* Б. Бикбай.

**ПОСТРО́МКА** [*рус.*] *и. кар.* **мисәү**[2] 2.

**ПОСТУЛА́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* Иҫбатһыҙ көйө нигеҙ итеп ҡабул ителә торған фарази фекер. *Постулат рәүешендә әйтеү.*

**ПОСЫ́ЛКА** [*рус.*] *и.* Төрөп йәки йәшниккә һалып, почта аша ебәрелгән нәмә. *Посылка алыу. Посылка ебәреү. Посылка һалыу.* ■ [*Тимашовка*] *дүрт-биш көндә бер посылка килә. Һәр посылкала суска майы, колбаса, кәнфит була.* Д. Юлтый.

**ПОСЫ́ЛЬНЫЙ** [*рус.*] *и.* Ойошмалар араһында рәсми әлемтә эшен башҡарған, кеше; йомошсо. *Полк командирынан посыльный килде. Ул Георгийҙы ла, Миңнегәлиҙе лә саҡыртҡан.* Ә. Ихсан.

**ПОТА́Ш** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Бөртөклө онтаҡ рәүешендәге һелтеле матдә (ағас көлөнән, хлорлы кальцийҙан алына).

**ПОТЕНЦИА́Л** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *физ.* Есемдең бер берәмек массаһындағы эске энергия мөмкинлеген күрһәткән дәүмәл. *Потенциалдар айырмаһы. Тартыу көсөнөң потенциалы.*

**2.** *күсм. кит.* Ниндәйҙер көс-көүәтте эсенә алған мөмкинлек. *Дәүләттең экономик потенциалы.* ■ *Илебеҙҙең экономик потенциалы байтаҡҡа үҫте. 1980 йыл менән сағыштырғанда милли доход 17 процентҡа күтәрелде.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 9 ноябрь.

**ПОТЕНЦИАЛЬ** [*рус.* потенциальный] *с. кит.* Эске мөмкинлек хәлендәге. *Есемдең потенциаль энергияһы.* / Мөмкин, ихтимал булған. *Потенциаль дошман. Потенциаль мөмкинлектәр.*

**ПОТЕ́НЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Эске мөмкинлек, эске һәләтлек. *Үҫемлектәрҙең емеш биреү потенцияһы.*

**ПОТРЕБИ́ТЕЛЬ** [*рус.*] *и.* Файҙаланыусы, алыусы. *Потребителдәр кооперацияһы. Потребителдәр пайы.*

**ПОХЛАУ** *к.* Пох-пох итеү, пох-пох килеү. *Ана килде паровоз, похлай нәгеҙ ялмауыҙ.* Д. Юлтый.

**ПОХО́Д** [*рус.*] *и.* **1.** Ойошҡан төркөмдөң билдәле маҡсат менән башҡарған сәфәре. *Туристик поход. Йәйәүле поход. Походҡа йыйыныу. По-*

*ходка сығыу.* ■ *Көнө-төнө поход йөрөп аяктарыбыҙ бөттө* (Бәйеттән).

**2.** *кар.* **яу** 1. *Башҡорттар .. Перовскийҙың Хива походында (1839 йыл) һәм Ҡырым һуғышында (1853—1856 йыл) ҡатнаша.* М. Хисмәтов.

**ПОХОЛДАУ** *ҡ.* Пох-пох итеү, пох-пох килеү.

**ПОХ-ПОХ** *окш.* Ауыр итеп тын алғанды йәки шуға оҡшаш башҡа нәмәне белдергән һүҙ; бох-бох. *Пох-пох итеп ултырыу.*

**ПОЧЕРК** [*рус.*] *и.* Кешенең үҙенә хас яҙыу рәүеше. *Аңлайышлы почерк. Балалар почеркы. Таныш почерк. Почеркы эре.* / *күсм.* Кешенең ижадына, эшенә хас үҙенсәлек. *С. Агиш гәйәт үҙенсәлекле, бер кемдекенә лә оҡшамаған почерклы.., оҫта телле, ҡыҫҡа һүҙле яҙыусы.* С. Кулибай.

**ПОЧЁТ** [*рус.*] *и.* Маҡтау, хөрмәт.

♦ **Почёт грамотаһы** *шул ук* **маҡтау ҡағыҙы** (*кар.* **ҡағыҙ**). **Почёт ҡарауылы** *шул ук* **хөрмәт ҡарауылы** (*кар* **ҡарауыл**[1]). **Почёт таҡтаһы** *шул ук* **маҡтау таҡтаһы** (*кар.* **таҡта** 2).

**ПОЧЁТЛЫ** *с.* Маҡтаулы, хөрмәтле. *Ҡаланың почётлы гражданы.*

**ПОЧТА** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и.* **1.** Урындан урынға газета, журнал, хат, аҡса кеүек нәмә йөрөтөп таратҡан элемтә ойошмаһы. *Почта бүлеге. Почта йәшниге. Почта маркаһы. Почта мисәте. Ялан почтаһы.* ■ *Башҡорт атын дағалатмай оҙон юл почта сапмай.* С. Кулибай.

**2.** Кәрәк нәмәнең шул ойошма аша ебәрелеүе. *Ашығыс почта. Почта менән ебәреү.* ■ *Зәйнәпкәйем, почта һайын хатың көтөрмөн.* Ғ. Сәләм.

**3.** Шул ойошма аша ебәрелгән нәмә. *Почтаны айырыу. Почта ташыу.*

**ПОЧТАЛЬОН** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Корреспонденцияларҙы адресаттарына таратып йөрөгән почта хеҙмәткәре; хат ташыусы. *Почтальон булып эшләү.*

**ПОЧТАМТ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ҡала почталарының үҙәк идараһы һәм шул идара урынлашҡан йорт.

**ПОШЛИНА** [*рус.*] *и.* Сик аша үткәрелгән тауар өсөн түләнә торған дәүләт һалымы. *Таможня пошлинаһы. Импорт пошлинаһы. Экспорт пошлинаһы. Пошлина һалыу.* / Дәүләт ҡулындағы ҡайһы бер эш өсөн йыйыла торған аҡса. *Пошлина түләү. Пошлина алыу.*

**ПОЭЗИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Көйгә һалып, һүрәтләштереп әйтеү сәнғәте; нәфис һүҙ ижады; шиғриәт. *Тәбиғәт, йәшлек, мөхәббәт — поэзияның бөтмәҫ-коромаҫ илһам сығанағы, поэзияның күрке.* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** Көйгә, үлсәмгә һалынған телмәр; шиғыр; *киреһе* проза. *Поэзия кисәһе.* / Халыҡ, дәүер йәки берәй ижтимағи төркөмдең бөтә булған шиғри әҫәрҙәре. *Башҡорт поэзияһы. Пролетариат поэзияһы. Романтик поэзия. Көнсығыш поэзияһы.* ■ *Рәшит Нигмәти поэзияһына .. тәүге поэтик әҫәрҙәренән үк йәшлек дәрте, көрәш рухы, юғары пафос хас.* Ғ. Хөсәйенов.

**3.** *күсм.* Уй, тойғоға ныҡ тәьҫир иткән матурлыҡ, гүзәллек. *Тормош поэзияһы. Тәбиғәт поэзияһы.*

**ПОЭМА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Шиғыр менән хикәйәләп яҙылған күләмле әҙәби әҫәр. *Лирик поэма. Эпик поэма.* ■ *Микрофонда Маяковскийҙың «Яҡшы» поэмаһын уҡыйҙар.* Ғ. Сәләм.

**2.** Ирекле формалағы музыка әҫәре.

**ПОЭТИК** *с.* **1.** Поэзияға (1, 2 мәғ.) мөнәсәбәтле; шиғри. *Поэтик әҫәр. Поэтик форма.*

**3.** Ижади һәләткә бәйләнешле. *Поэтик талант. Поэтик илһам.*

**3.** *күсм.* Уй, тойғоға ныҡ тәьҫир итерлек; матурлыҡ, гүзәллек менән һуғарылулы. *Поэтик донъя.*

**ПОЭТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. әҙ.* **1.** Поэтик ижадтың форма һәм принциптарын өйрәнә торған әҙәбиәт теорияһы тармағы.

**2.** Шағирға йәки әҙәби йүнәлешкә хас поэтик форма һәм принциптар системаһы. *Ш. Бабич поэтикаһы. Романтизм поэтикаһы.*

**ПОЭТИКЛАШТЫРЫУ** *ҡ. кар.* **шиғрилаштырыу.**

**ПОЯС** [*рус.*] *и. кар.* **бүлкәт** 2, 3.

**ПРАВА** [*рус.*] *и.* Машина йөрөтөү хоҡуғы биргән рөхсәт ҡағыҙы. *Права алыу. Праваны юғалтыу.*

**ПРАВЛЕНИЕ** [*рус.*] *и. кар.* **идара** 2.

**ПРАВОСЛАВ** [*рус.* православный] *с.* **1.** Православиеға мөнәсәбәтле *Православ дин. Православ сиркәү.*

**2.** Православие динен тотҡан. *Православ халыҡ.* // *Православтар йыйыны.*

**ПРАВОСЛАВИЕ** [*рус.*] *и.* Христиан диненең Византияла барлыҡҡа килгән бер йүнәлеше, революцияға тиклемге Россияла рәсми дин.

**ПРАКТИК** *с.* **1.** Эш, тормош талаптары менән билдәләнгән. *Мәсьәләнең практик яғы. Практик мөмкинлек. Практик мәсьәлә. Практик ярҙам. Практик кәңәш.*

**2.** Туранан-тура эшкә, тормошҡа бәйле. *Практик етәкселек. Белемде практик рәүештә файҙаланыу.*

**3.** Эш, тормошто белеп, файҙа бирерҙәй нәмәне алдан ҡараусан. *Практик кеше. Практик аҡыл.*

**ПРАКТИК** *и.* [*рус.*] *и.* Үҙ эшендә күп тәжрибә туплаған, үҙ һөнәренә тәжрибә нигеҙендә эйе булған кеше.

**ПРАКТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *филос.* Кешенең йәмғиәт тормошон тәьмин итеүгә йүнәлтелгән бөтә эшмәкәрлеге. *Теорияны практика менән бәйләү.*

**2.** Теоретик фекерҙе тормошҡа ашырыу өлкәһе булған тормош; булмыш. *Практикала файҙаланыу. Практикаға индереү.*

**3.** Теоретик белемде ғәмәлдә ҡулланыу эше; күнекмә. *Практикаға йөрөү. Йәйге практика.* ■ [*Сәлимә:*] *Ауыл хужалығы институтында уҡыйым, һеҙҙең колхозға практика үтергә килдем.* З. Хисмәтуллин.

**4.** Ниндәйҙер эшмәкәрлек йәки тормош өлкәһендә тупланған күнекмә, тәжрибә. *[Мәрзиә:] Мин электромеханика буйынса практика алырға, шуның буйынса институтта ситтән тороп уҡырға булдым.* С. Кулибай.— *Көлмәгеҙ, мин быны үҙ практикамдан беләм.* С. Агиш.

**ПРАКТИКА́НТ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Практика (3 мәғ.) үтеп йөрөгән кеше.

**ПРА́КТИКУМ** [*рус.* ⟨*фр.*]. *и.* Уҡыу йортондағы бер-бер фән буйынса үтелгән практик дәрес.

**ПРА́ПОРЩИК** [*рус.*] *и.* **1.** Революцияға тиклемге армияла иң кесе офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше.

**2.** Совет Армияһында кесе лейтенанттан түбән һәм старшинанан юғары баҫҡыстағы дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше.

**ПРА́ЧЕЧНЫЙ** [*рус.* прачечная] *и.* Кер йыуҙыра торған урын. *Керҙе прачечныйға биреү.*

**ПРЕДМЕ́Т** [*рус.*] *и.* **1.** *кар.* **нәмә** 1.

**2.** *кар.* **фән** 2.

**3.** *кар.* **мәсьәлә** 2.

**ПРЕДОХРАНИ́ТЕЛЬ** [*рус.*] *и.* *кар.* **һаҡлағыс** 1.

**ПРЕДПРИНИМА́ТЕЛЬ** [*рус.*] *и.* Ниндәй ҙә булһа предприятие тотҡан хужа.

**ПРЕДПРИЯ́ТИЕ** [*рус.*] *и.* Ниҙер эшләп сығарған йәки сауҙа иткән хужалыҡ берәмеге. *Дәүләт предприятиеһы. Кооператив предприятие.* ■ *Предприятиеларҙы техник яҡтан ҡайтанан ҡоралландырыу һәм реконструкциялау күләме арта.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 ғинуар.

**ПРЕДСЕДА́ТЕЛЬ** [*рус.*] *и.* **1.** Йыйылышҡа, ултырышҡа етәкселек иткән кеше; рәис. *Председателлек итеү. Йыйылыштың председателе.*

**2.** Ҡайһы бер ойошмаларҙың етәксеһе. *Ауыл советы председателе. Министрҙар советы председателе. Колхоз председателе.*

**ПРЕЗИДЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Йәмғиәт йәки ғилми учреждениеға етәкселек итеү өсөн һайланған председатель. *Фәндәр академияһы президенты.*

**2.** Республика формаһында идара ителгән дәүләткә билдәле ваҡытҡа һайланған башлыҡ.

**ПРЕЗИ́ДИУМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Йыйылыш йәки кәңәшмәне алып барыу өсөн һайланған етәкселек. *Президиум һайлау. Президиумда ултырыу.*

**2.** Ҡайһы бер йәмғиәт һәм ойошмаларҙың етәкселеге. *Россия Фәндәр академияһының президиумы. Президиум ағзаһы.* / *йыйн.* Шул етәкселектә ағза булған кешеләр.

**ПРЕЙСКУРА́НТ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Тауарҙарҙың хаҡын күрһәткән исемлек. *Күләм артынан ҡыуып, бәғзе предприятие етәксеһе хеҙмәтләндереү прейскурантын да ҡиммәтерәк итергә ынтыла.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 23 ғинуар.

**ПРЕ́МИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Эш өлкәһендәге ҡаҙаныш өсөн аҡсалата, ҡиммәтле нәмә һ. б. рәүештә бирелгән бүләк. *Дәүләт премияһы. Салауат Юлаев исемендәге премия.* / Норманы арттырып үтәгән өсөн эш хаҡына өҫтәп бирелгән аҡса. *Премия алыу. Премия биреү. Премия фонды. Премия аҡсаһы.*

**ПРЕМЬЕ́РА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Театр пьесаһының, балеттың, кинофильмдың һ. б. тәүге тамашаһы.

**ПРЕ́НИЕ** [*рус.*] *и.* Берәй мәсьәләне тикшергәндә ҡатнашҡан кешеләрҙең фекер алышыуы.

**ПРЕПАРА́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *хим. фарм.* Лабораторияла йәки фабрикала эҙерләнеп, дауалау йәки башҡа маҡсатта файҙаланылған нәмә. *Ағыулы препарат. Витаминлы препарат.*

**2.** Тикшереү, күҙәтеү өсөн әҙерләнгән хайуан йә үҫемлек ағзаһының өлөшө. *Анатомик препарат.*

**ПРЕПАРА́ТОР** [*рус.*] *и.* Препараттар әҙерләй торған кеше.

**ПРЕПОДАВА́ТЕЛЬ** [*рус.*] *и.* *кар.* **уҡытыусы.**

**ПРЕСЛАНЫУ** *ҡ.* *төш.* *кар.* **преслау.**

**ПРЕСЛАУ** *ҡ.* Пресс менән баҫыу, ҡыҫыу. *Бесәнде преслау.*

**ПРЕСС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡыҫып, баҫып бер рәүешкә килтерә, эшкәртә торған машина. *Гидравлик пресс. Ҡул пресы. Штамплау пресы.*

**ПРЕ́ССА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Периодик матбуғат. *Ғилми пресса.*

**2.** *йыйн.* *һөйл.* Периодик матбуғат вәкилдәре; журналистар.

**ПРЕСС-АТТАШЕ́** [*рус.*] *и.* Дипломатик вәкәләттәң (илселектең, миссияның һ. б.) матбуғат мәсьәләләре буйынса хеҙмәткәре.

**ПРЕСС-БЮРО́** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* **1.** Журналистарҙы съездарҙа, спорт ярыштарында һ. б. информация һәм ойошторОу буйынса хеҙмәтләндерә торған бүлек.

**2.** Эре газета редакциялары, матбуғат агентстволары эргәһендәге информация бүлеге.

**ПРЕСС-КОНФЕРЕ́НЦИЯ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Дәүләт, политика, йәмәғәт, фән эшмәкәрҙәренең матбуғат вәкилдәре менән төрлө белешмә биреү өсөн үткәрелгән осрашыуы.

**ПРЕТЕНДЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* *кар.* **дәғүәсе** 2. *Претендент булыу.*

**ПРЕФЕ́КТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Францияла департамент башлығы.

**2.** Ҡайһы бер капиталистик илдәрҙә полиция башлығы.

**ПРЕФЕКТУ́РА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡайһы бер капиталистик илдәрҙә административ-территориаль берәмек идаралығы һәм шул идаралыҡ урынлашҡан бина.

**ПРЕФЕРА́НС** [*рус.* ⟨ *фр.*] *с.* Кәрт уйындарының бер төрө.

**ПРЕ́ФИКС** [*рус.*] *и.* *грам.* Һүҙҙең алғы ҡушымсаһы (мәҫ. «подписка» тигәндә «под»).

**ПРИБО́Р** [*рус.*] *и.* **1.** Төрлө хеҙмәттә үлсәү, тикшереү, күҙәтеү эштәрен башҡара торған ҡулайлама, ҡорамал. *Оптик прибор. Үлсәү приборы.*

**2.** Билдәле бер эш өсөн ҡулланылған нәмәләр йыйымы. *Яҙыу приборы.*

**ПРИБОРСЫ** *и.* Эштәге приборҙарҙы (1 мәғ.) хеҙмәтләндергән эшсе.

**ПРИВА́Л** [*рус.*] *и.* Поход ваҡытында, юлда барғанда һ. б. ял итеү өсөн туҡталыш. *Привалға туҡтау. Привал яһау.*

**ПРИВИ́ВКА** [*рус.*] *и.* **1.** Ауырыуға ҡаршы тәнгә вакцина ебәрелеүе. *Прививка яһау.*

**2.** Бер ағас ботағының йәки бөрөһөнөң икенсе ағас төбөнә екләп ултыртылған өлөшө һәм шулай уҡ шундай өлөшө булған үҫемлек.

**ПРИВИЛЕ́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Башҡаларҙан өҫтөнлөк биргән хоҡуҡ. *Привилегия биреү. Привилегия менән файҙаланыу.*

**ПРИГОВО́Р** [*рус.*] *и.* *кар.* **хөкөм** 2.

**ПРИЁМНИК** [*рус.*] *и.* Радио тапшырыуҙарын тота торған аппарат. *Ишек алдында бер төркөм ир транзисторлы приёмниктан хоккей ярышын тыңлап, күңел асып ултыра.* И. Абдуллин.

**ПРИЗ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ярышта еңгән кешегә бирелә торған бүләк. *Приз алыу.*

**ПРИЗЛЫ** *с.* Приз менән билдәләнгән, приз ҡуйылған. *Призлы урын.*

**ПРИЗМА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мат.* Ике яғы параллель күпмөйөштән, ян-яғы параллелограмдарҙан торған күп ҡырлы геометрик есем.

**ПРИЗЫВ** [*рус.*] *и.* **1.** Билдәле йәштәге кешеләрҙең хәрби хеҙмәткә саҡырылыуы. *Мин призывка барҙым, Алыҫ Көнсығышҡа алдылар.* Ғ. Сәләм.

**2.** Бер үк ваҡытта хәрби хеҙмәткә саҡырылған билдәле бер йәштәге кешеләр.

**ПРИЗЫВНИК** [*рус.*] *и.* Хәрби хеҙмәткә саҡырылған кеше.

**ПРИИСК** [*рус.*] *и.* Ҡиммәтле мәғдән ҡаҙылған урын. *Алтын приискыһы. Баҡыр приискыһы.*

**ПРИКАЗ** [*рус.*] *и.* Бойороҡ, әмер. *Хәрби приказ. Приказ биреү. Приказ менән үткәреү.*

**ПРИКАЗЧИК** [*рус.*] *и. иҫк.* **1.** Магазин хужаһына ялланып һатыу иткән кеше; һатыусы. *[Гәрәй:] Әхмәров эфәндененң берәй лавкаһында приказчик-маҙар булып эшләр ҙә, сауҙа эшенә өйрәнер инем.* Б. Бикбай.

**2.** Алпауыттың хужалығын алып барған хеҙмәткәр. *Приказчик баярҙың .. ҡайтырын ишеткәнгәме, әллә .. бушай алмағангамы, ике йоманан артыҡ инде Айбулатҡа иҫәп бирмәй һуҙып йөрөтә.* Һ. Дәүләтшина.

**ПРИКЛАД** [*рус.*] *и.* Мылтыҡ, автомат кеүек нәмәнең атҡанда яурынға терәй торған яҫы осо; төйҙә. *Һалдаттар [сусканы] мылтыҡ прикладтары менән төртөп, сыйылдатып ҡырға сығарып ебәрҙе.* Д. Юлтый.

**ПРИЛАВКА** [*рус.* прилавок] *и.* Магазинда, баҙарҙа һатыусы алдына ҡуйылған оҙон, алды ябыҡ тар өҫтәл.

**ПРИМИТИВ** [*рус.* примитивный ⟨ *лат.*] *с.* **1.** Кешелек йәмғиәтененң тәүге үҫеш дәүеренә мөнәсәбәтле. *Примитив ижтимағи баҫҡыс.*

**2.** Төҙөлөшө ябай. *Примитив механизм.* / Үтә ябайлаштырылған; һай. *Примитив шиғыр.*

**ПРИМИТИВИЗМ** [*рус.*] *и.* **1.** Берәй күренешкә ҡарата ябайлаштырылған ҡараш. *Утыҙынсы йылдарҙа фольклористар электән килгән примитивизм һәм натурализм кеүек күренештәрҙән ҡотола [башлай].* К. Мәргән.

**2.** 19—20 быуаттар аҙағында һынлы сәнғәттә барлыҡҡа килгән, кешелек донъяһының башланғыс дәүерендәге сәнғәт әҫәрҙәренә эйәреп, һүрәтләү сараларын артыҡ ябайлаштырыуға ынтылған йүнәлеш.

**ПРИМУС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Кәрәсин бөркөп яна торған насослы йылытҡыс прибор. *Примусты тоҡандырыу.*

**ПРИНЦ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Көнбайыш Европала батша ғаиләһененң ағзаһына йәки күренекле кенәзгә бирелә торған дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше.

**ПРИНЦЕССА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Принцтың ҡатыны йәки ҡыҙы.

**ПРИНЦИП** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Билдәле бер фәндең, тәғлимәттең, ҡараштың асылын тәшкил иткән төп фекер. / Берәй эштең йүнәлешен билдәләгән төп күрһәтмә, ҡағиҙә. *Башҡорт әҙәби теленең орфографияһы фонетик принципҡа ҡоролған.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 22 ноябрь. *Социаль гәҙеллек принциптарын тормошҡа анык ашырыу — халыҡ берҙәмлегененң, йәмғиәттең политик тотороҡлолоғононң, үҫеш динамизмының мөһим шарты.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.

**2.** Берәй нәмәгә ҡарата алған юл, ҡараш; эш-тормош ҡағиҙәһе. *Васяның принцибы бик ябай: эшнәң һине йәберләгән икән, үпкәләп, турһайып йөрөмә, тот та тукма.* Х. Мохтар.

**ПРИНЦИПИАЛЛЕК** *и.* Билдәле бер принциптарҙың теорияла һәм практикала эҙмә-эҙ үткәрелеше. *Принципиаллек күрһәтеү.*

**ПРИНЦИПИАЛЬ** [*рус.* принципиальный] *с.* **1.** Төп принципҡа бәйле, төп фекергә ҡағылышлы. *Принципиаль мәсьәлә. Принципиаль ҡаршылыҡ.*

**2.** Билдәле принциптарҙы ныҡ һаҡлаған, шул принциптарға таянып эш иткән. *Принципиаль кеше. Принципиаль тәнҡит.*

**ПРИНЦИПҺЫҘ** *с.* Билдәле принцибы, ныҡлы ҡараш һәм йүнәлеше юҡ. *Принципһыҙ кеше. Принципһыҙ сығыш.*

**ПРИОРИТЕТ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Ғилми асыш, табыштағы беренселек.

**2.** *ҡар.* **өҫтөнлөк** 2.

**ПРИПАС** [*рус.* припасы] *и.* Туп-мылтыҡтың, снаряд, патрон кеүек, ата торған яһағы. *Һуғыш припасы.* ■ *Һуғыш ҡоралдары, припастары тейәп, башҡорт егеттәре эшелон-эшелон булып ҡояш байышына ҡарай китте.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 3 июль.

**ПРИПОЙ** [*рус.*] *и.* Паятлау өсөн ҡулланылған металл иретмәһе.

**ПРИПУЩЕНИК** [*рус.*] *и. тар.* Ситтән килеп, башҡорт еренә урынлашҡан кеше; керҙәш.

**ПРИСТАВ** [*рус.*] *и.* Революцияға тиклемге Россияла: урындағы полиция башлығы. *Алып китте пристав төрткөләп, яурынына терәп нағанын.* М. Хәй.

**ПРИСТАНЬ** [*рус.*] *и.* Караптар туҡтап, бушатына, тейәнә һәм пассажирҙарҙы төшөрә, ултырта торған махсус урын. *Сөнәгәт Саҡай пристанендә пароходҡа ултырып Өфөгә китте.* Ж. Кейекбаев.

**ПРИСТУП** [*рус.*] *и. ҡар.* **өйәнәк** [1] 1.

**ПРИСЯЖНЫЙ** [*рус.*]: **присяжный заседатель** буржуаз судта: суд эштәрен ҡарауҙа ҡатнашлыҡ итеү өсөн билдәле ваҡытҡа һайлап, ҡатнаштырылған кеше.

**ПРИЦЕЛ** [*рус.*] *и.* Атыу ҡоралының тоҫҡай торған ҡулайламаһы; мәрәйлек. *Новиков танкты күҙгатмаҫҡа ҡуша ла, үҙе прицелдан күҙәтә башлай.* Ғ. Аллаяров.

**ПРИЦЕП** [*рус.*] *и.* Машина, тракторға тағыла торған арба.

**ПРИЦЕПЩИК** [*рус.*] *и.* Тағылмалы ауыл хужалығы машинаһында эшләгән кеше. *Йәй көнө пар һөргән ваҡытта уны [Камилды] прицепщик итеп беркеттеләр.* Ә. Вәли.

**ПРИЧА́Л** [*рус.*] *и.* Карап туктау өсөн йәтешләнгән махсус урын.

**ПРИЧЁСКА** [*рус.*] *и.* Бер рәүешкә килтереп, рәтләп ҡуйылған сәс. *Модалы причёска. Причёска яһау.*

**ПРИЮ́Т** [*рус.*] *и.* Революцияға тиклемге Рәсәйҙә: ҡарауһыҙ балаларҙы тәрбиәләй торған ойошма. *Приют балалары.* ■ *Приютта ике йөҙҙән артыҡ ҡыҙ тәрбиәләнә. Был приют бер бай тол ҡатын тарафынан һалынған.* Д. Юлтый.

**ПРО́БА** [*рус.*] *и.* **1.** Берәй нәмәнең тикшереү өсөн алынған өлгөһө. *Аштың пробаһы. Ҡоростоң пробаһы. Проба алыу.*

**2.** Ҡиммәтле металдың иретмәләге күләмен күрһәткән һан һәм шундай иретмәләрҙән эшләнгән нәмәләрҙең һанын билдергән келәймә.

**ПРОБИ́РКА** [*рус.*] *и.* Лабораторияла ҡулланыла торған бер яғы бөтәш быяла көпшә.

**ПРО́БКА** [*рус.*] *и.* **1.** Электр тогы ныҡ көсәйеп киткәндә, сымды өҙөп, хәүефте киҫәтә торған ҡулайлама.

**2.** *кар.* **кигермәк** 1.

**3.** *кар.* **тығын** [1] 1.

**ПРОБЛЕ́МА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Хәл ителергә тейеш булған теоретик йәки практик мәсьәлә. *Ҡатмарлы проблема. Педагогик проблема.*

**ПРОБЛЕМАТИК** *с.* Иҫбат ителмәгән, уйланылған. *Проблематик мәсьәлә.*

**ПРОБЛЕМА́ТИКА** [*рус.*] *и.* Бер өлкәгә ҡараған проблемалар. *Ғилми эштең проблематикаһы.*

**ПРОВИНЦИАЛЬ** [*рус.* провинциальный] *с.* Үҙәк ҡалаларҙан алыҫ урындағы. *Провинциаль ҡала.* / Үҙәк ҡалаларҙан алыҫ урында йәшәгән, эшләгән. *Провинциаль артист.*

**ПРОВИ́НЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ҡайһы бер дәүләттәрҙә административ-территориаль берәмек.

**2.** *иҫк.* Үҙәк ҡалаларҙан алыҫ урын. *Провинция кешеһе. Провинция ҡалаһы.*

**ПРОВОДНИ́К** [1] [*рус.*] *и. кар.* **үткәргес** 2.

**ПРОВОДНИ́К** [2] [*рус.*] *и.* Тимер юлдағы вагон ҡараусы. *Вагон проводнигы, өҫтөнә аҡ китель, башына күкһел берет кейгән йәш ҡатын: «Хәҙер Дим станцияһына етәбеҙ»,— тип хәбәр итте.* Ә. Вәли.

**ПРОВОКА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Провокация юлы менән эш иткән йәшерен агент. *Мәскәүҙәге ҡоралды хәрәкәт еңелгәндән һуң провокаторҙың ошағы буйынса батша хөкүмәте Точисскийҙы ҡулға ала.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 6 ғинуар.

**2.** Ҡотҡо таратыу менән шөғөлләнгән кеше.

**ПРОВОКАЦИО́Н** [*рус.* провокационный] *с.* Провокацияға мөнәсәбәтле. *Провокацион хәбәр.*

**ПРОВОКА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Кеше йәки халыҡты ауыр, фажиғәле хәлгә ҡалырлыҡ хата аҙымға баҫтырған яуыз ниәтле эш. *Провокация яһау.* / Йәшерен полиция агенттарының, революцион ойошмаларға үтеп инеп, шымсылыҡ итеү, уларҙы туҙҙырыу ниәтендә алып барған эшмәкәрлеге.

**ПРОГНО́З** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Төрлө мәғлүмәт нигеҙендә берәй эш, хәлдең ағышы, үҫеше һ. б. тураһындағы фараз. *Һауа прогнозы. Прогноз яһау.*

**ПРОГРА́ММА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Алдағы эшмәкәрлектең планы. *Үҫеш программаһы. Программа төҙөү.*

**2.** Политик партияның йәки ижтимағи ойошманың төп принциптары һәм маҡсаты яҙылған документ.

**3.** Берәй сараны үткәреү, алып барыу планы, тәртибе. *Съезд эшенең программаһы.*

**4.** Концертта, радио, телевидениела тапшырылған номерҙар теҙмәһе. *Концерт программаһы. Радио программаһы.*

**5.** Уҡытылған фәндәрҙең ҡыҫҡаса эстәлеген һәм методологик йүнәлешен күрһәткән ҡулланма. *Математика программаһы. Башҡорт теле программаһы.*

**6.** Станок, машина, ҡоролмаға һ. б. автоматик үтәү өсөн булған эш планы. *Станок өсөн деталдәрҙе эшкәртеү программаһы.* / Махсус техника тарафынан шундай эш планы үтәлеү процесының тасуирланыуы. *Электронлы иҫәпләү машинаһы өсөн программа.*

**ПРОГРЕ́СС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Алға китеш, үҫеш. *Ижтимағи прогресс. Техник прогресс.* ■ *Фәнни техник прогресты тиҙләтеү, эшләп килгән производствоны техник яҡтан ҡайтанан ҡоралландырыу һәм реконструкциялау буйынса эш активлашты.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 9 ноябрь.

**ПРОГРЕССИВ** [*рус.* прогрессивный] *с.* **1.** Үҫә, арта, көсәйә барған. *Прогрессив эш хаҡы.*

**2.** Алға, яңылыҡҡа барған; алдынғы. *Прогрессив идеялар. Прогрессив көстәр. Прогрессив культура. Прогрессив ҡараш. Прогрессив йүнәлеш.*

**ПРОГУ́Л** [*рус.*] *и.* Кешенең сәбәпһеҙ эш ҡалдырыуы. *Прогул яһау.*

**ПРОГУ́ЛКА** [*рус.*] *и.* Саф һауала үткәрелгән бәләкәй ял сәйәхәте. *Прогулкаға сығыу.*

**ПРОГУЛСЫ** *и.* Прогул яһаған кеше. *Прогулсыға цехта урын юҡ.* М. Тажи.

**ПРОДУ́КТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Кеше хеҙмәте менән эшләнгән нәмә. / Производствоның берәй өлкәһендәге эш, хеҙмәт һөҙөмтәһе булған нәмә, матдә һ. б. *Ауыл хужалығы продукттары. Малсылыҡ продукттары.*

**2.** Химик йәки башҡа юл менән бүтән матдәнән барлыҡҡа килгән матдә. *Ягыулыҡ янғандан булған продукт.*

**ПРОДУКТИВ** [*рус.* продуктивный] *с.* **1.** Файҙалы, һөҙөмтәле. *Продуктив хеҙмәт.*

**2.** *лингв.* Әле лә ҡулланылған, яңы һүҙ яһауға һәләтле. *Продуктив ялғау.*

**ПРОДУКТИВЛЫҠ** *и.* **1.** Файҙалы һөҙөмтә биреү һәләтлеге. *Хеҙмәттең продуктивлығы.*

**2.** Продукция биреү һәләтлеге (малдың, ҡош-ҡорттоң). *Малдың продуктивлығын арттырыу.*

**ПРОДУКТЛЫЛЫҠ** *и. кар.* **продуктивлыҡ.**

**ПРОДУ́КЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Дөйөм хужалыҡ йәки хужалыҡ берәмегенең билдәле ваҡыт эсендә етештергән бөтә продукты. *Йыллыҡ продукция. Тулайым продукция.* / Хеҙмәт етештергән айырым бер нәмә. *Әҙер продукция. Еңел промышленность продукцияһы.* / Баш, ижад эшенең һөҙөмтәһе. *Ғилми продукция. Әҙәби продукция.*

**ПРОЕ́КТ** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* **1.** Ниҙер төҙөү, ҡороу, ойоштороу эшенең ентекле планы. *Йорт проекты. Проект бюроһы. Проект төҙөү.*

**2.** Документтың алдан әҙерләнгән яҡынса тексы. *Закон проекты. Ҡарар проекты. Устав проекты.*

**ПРОЕКТЛАУ** *ҡ. кар.* **проектлаштырыу.**

**ПРОЕКТЛАУСЫ** *и. кар.* **проектсы.**

**ПРОЕКТЛАШТЫРТЫУ** *ҡ. йөкм. кар.* **проектлаштырыу.**

**ПРОЕКТЛАШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. кар.* **проектлаштырыу.**

**ПРОЕКТЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Ниҙеңдер проектын (1 мәғ.) төҙөү; проектлау. *Заводты проектлаштырыу. Проектлаштырыу ойошмаһы.*

**ПРОЕКТСЫ** *и.* Проект (1 мәғ.) төҙөүсе; проектлаусы.

**ПРОЕКЦИОН** [*рус.* проекционный] *с.* Проекцияға мөнәсәбәтле.

♦ **Проекцион фонарь** һүрәтте ҙурайтып экранға төшөрә торған оптик аппарат.

**ПРОЕ́КЦИЯ** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* **1.** *мат.* Арауыҡтағы фигураларҙың яҫылыҡтағы һүрәтләнеше. *Ҡыйыш мөйөшлө проекция. Проекция кусәре. Проекция һыҙыу.*

**2.** *махс.* Хәрәкәтһеҙ объекттарҙың экранға оптик аппарат аша төшөрөлөшө.

**ПРОЖЕ́КТОР** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Көслө яҡтылыҡ нурын бер йүнәлешкә төбәп ебәрә торған ҡорамал. *Прожектор лампаһы. Прожектор нуры.* ■ *Прожекторҙар, ракеталар төндө көндөҙгө кеүек яҡтырта.* Д. Юлтый.

**ПРОЖЕКТОРСЫ** *и.* Прожекторҙы хеҙмәтләндергән кеше.

**ПРО́ЗА** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Көйгә, үлсәмгә һалмай яҙылған, шиғри булмаған әҙәби әҫәр; сәсмә әҫәр. *Проза менән яҙыу. Проза әҫәре.*

**ПРОЗА́ИК** [*рус.*] *и.* Сәсмә әҫәр яҙған яҙыусы.

**ПРОЙГРЫВАТЕЛЬ** [*рус.*] *и.* Граммофон пластинкаһын уйната торған электрик аппарат.

**ПРОИЗВО́ДСТВЕННИК** [*рус.*] *и.* Производствола туранан-тура ҡатнашҡан кеше.

**ПРОИЗВО́ДСТВО** [*рус.*] *и.* **1.** *эк.* Материаль байлыҡтар булдырыуҙа йәмғиәттең етештереү көстәре менән кешеләрҙең производстволағы мөнәсәбәттәрен солғап ала торған ижтимағи процесс. *Йәмғиәт производствоһы. Социалистик производство. Тауарлыҡлы производство. Производство үҫеше. Производствоны автоматлаштырыу. Производствоны интенсивлаштырыу. Производствоны компьютерлаштырыу. Производствоны рационаллаштереү. Производствоны роботлаштырыу.*

**2.** Продукцияны туранан-тура етештереү эше.

**3.** Промышленность тармағы, төрө. *Автомобиль производствоһы.*

**ПРОКА́Т** [1] [*рус.*] *и. тех.* **1.** Металдың әйләнеп торған ике вал араһынан үткәреп эшкәртелеше. *Прокат цехы. Прокат станы.*

**2.** *йыйн.* Шул юл менән эшкәртеп яһалған металл нәмәләр.

**ПРОКА́Т** [2] [*рус.*] *и.* Хаҡ түләп, ваҡытлыса файҙаланылған нәмәләрҙең алыш-биреше. *Прокатҡа алыу. Прокатҡа биреү. Прокат пункты.*

**ПРОКАТЛАНЫУ** *ҡ. төш. кар.* **прокатлау.**

**ПРОКАТЛАУ** *ҡ. тех.* Прокаттан үткәреү (металды). *Прокатлау эше.*

**ПРОКАТСЫ** *и.* Прокат цехында эшләгән эшсе.

**ПРОКЛАМА́ЦИЯ** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Политик йөкмәткеле агитация ҡағыҙы. *Прокламация баҫыу. Прокламация таратыу.*

**ПРОКУРО́Р** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* **1.** Закондың дөрөҫ үтәлешен күҙәтеп торған дәүләт кешеһе. *Ҡала прокуроры. Район прокуроры.*

**2.** Судта дәүләт исеменән һөйләгән ғәйепләүсе. *Прокурор телмәре.*

**ПРОЛЕТАР** [1] [*рус.* пролетарий] *и.* Капиталистик йәмғиәттәге етештереү ҡоралына эйә булмаған ялланма эшсе; пролетарий. *Бөтә илдең эшсән пролетары, беҙҙән һеҙгә еңеү сәләме.* Х. Ҡунаҡбай. *Ленин бабай пролетарҙарға тура юлдарҙы асты* (Халыҡ йырынан).

**ПРОЛЕТАР** [2] [*рус.* пролетарский] *с.* Пролетариатҡа мөнәсәбәтле, пролетариат принцибына нигеҙле. *Пролетар партия. Пролетар революция. Пролетар яҙыусы.* / Пролетариат принцибына ярашлы, пролетариатҡа хас. *Пролетар интернационализм.*

**ПРОЛЕТАРИА́Т** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Пролетарҙар [1] синыфы.

**ПРОЛЕТА́РИЙ** [*рус.* ‹ *лат.*] *и. кар.* **пролетар** [1].

**ПРОЛЕТАРЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Пролетар [1] итеү, пролетарға әйләндереү.

**ПРОЛЕТАРЛАШЫУ** *ҡ.* Пролетар [1] булыу, пролетарға әйләнеү.

**ПРОЛО́Г** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Әҙәби йәки музыкаль әҫәрҙең инеш өлөшө. *«Салауат Юлаев» операһының прологы.*

**ПРОМТАУАР** [*рус.* промтовары] *и.* Промышленность тауары. *Промтауар магазины.*

**ПРОМЫСЛА** [*рус.* промысел] *и.* **1.** Ҡаҙылма байлыҡ сығарған предприятие. *Нефть промыслаһы. Тоҙ промыслаһы.*

**2.** *кар.* **ау** [2] 1. *Балыҡ промыслаһы. Йәнлек промыслаһы.*

**ПРОМЫСЛОВИ́К** [*рус.*] *и.* Промыслала (1 мәғ.) эшләгән кеше.

**ПРОМЫ́ШЛЕННИК** [*рус.*] *и.* Капиталистик промышленность предприятиеһының хужаһы.

**ПРОМЫ́ШЛЕННОСТЬ** [*рус.*] *и.* **1.** Халыҡ хужалығының етештереү саралары һәм ҡулланыу нәмәләре етештереү, шулай уҡ ҡаҙылма байлыҡ сығарыу һәм эшкәртеү менән шөғөлләнгән тармағы. *Нефть промышленносы. Эшкәртеү промышленносы.*

**2.** Шул етештереү тармағының айырым төрө. *Химия промышленносы. Металлургия промышленносы. Ауыр промышленность. Еңел промышленность.*

**ПРОПАГА́НДА** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Билдәле бер йүнәлештә белем, тәғлимәт таратыу, аңлатыу эше. *Атеистик пропаганда. Пропаганда алып барыу.* ■ *Культура һәм сәнғәт үҫеш алды, культура-ағартыу учреждениелары, массовый информация һәм пропаганда средстволарының*

*эшмәкәрлегә камиллаштырылды.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 9 ноябрь.

**ПРОПАГАНДАЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **пропагандалау.**

**ПРОПАГАНДАЛАУ** *ҡ.* Билдәле бер йүнәлештә белем, тәғлимәт таратыу, аңлатыу. *Уҡытыу яңы ысулдарыны пропагандалау.*

**ПРОПАГАНДИСТ** [*рус.*] *и.* Пропаганда менән шөғөлләнгән кеше. *[М. Ғафури] китаптың, матбуғаттың ялҡынлы пропагандисы булып һөйләшә.* Ғ. Рамазанов.

**ПРОПАГАНДИСТИК** *с.* Пропагандаға мөнәсәбәтле. *Пропагандистик эш.*

**ПРОПАН** [*рус.*] *и.* Төҫһөҙ газ (тәбиғи хәлдә һәм нефть газдарында булып, нефть продукттарын эшкәрткәндә барлыҡҡа килә).

**ПРОПЕЛЛЕР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Двигатель ярҙамында хәрәкәткә килеп, тартыу көсөн барлыҡҡа килтерә торған бер нисә көрәкле өйрөлтмәк. *Аэросана пропеллеры. Самолёт пропеллеры.*

**ПРОПИСКА** [*рус.*] *и.* Кешенең йәшәгән еренә рәсми рәүештә теркәлеше һәм шул теркәлеште күрһәтеп паспортҡа ҡуйылған билдә. *Пропискаға инеү. Пропискаһыҙ йәшәү.* ■ *[Вәзиф:] Был өй .. хөкүмәттеке. Мин бында прописка менән торам.* М. Кәрим.

**ПРОПОРЦИОНАЛЬ** [*рус.* пропорциональный] *с.* **1.** Сағыштырма үлсәме, дәүмәле тейешле самаға тап килешле; нисбәтле. *Эш хаҡының пропорциональ бүленеүе.*

**2.** *мат.* Нимәгәлер нисбәтән арта йәки кәмей торған; нисбәтле. *Кире пропорциональ дәүмәлдәр. Ыңғай пропорциональ дәүмәлдәр.*

**ПРОПОРЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Өлөштәрҙең үҙ-ара бәрәбәре; нисбәт. / Ике нәмә араһындағы һан яғынан булған мөнәсәбәт; нисбәт.

**2.** *мат.* Мөнәсәбәтле ике һандың тигеҙлеге. *Геометрик пропорция.*

**ПРОПУСК** [*рус.*] *и.* Ҡайҙалыр инергә хоҡуҡ биргән документ. ■ *Типографияға инергә пропуск яҙып бир. Мин фабзавкомга инәм,— тине [Сәлим].* Х. Мохтар.

**ПРОРАБ** [*рус.*] *и.* Төҙөлөш эшенә туранан-тура етәкселек иткән техник йәки инженер; эш башҡарыусы.

**ПРОРЕКТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ректорҙың урынбаҫары, ярҙамсыһы.

**ПРОСПЕКТ** [1] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡалалағы оло урам.

**ПРОСПЕКТ** [2] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Баҫылырға тейеш хеҙмәттең ҡыҫҡаса йөкмәткеһен, планын күрһәткән яҙма. *Журналдың проспекты. Китаптың проспекты.*

**2.** Реклама характерындағы белешмә баҫма. *Матур итеп биҙәлгән реклама проспекты.*

**ПРОСТРАНСТВО** [*рус.*] *и.* Ян-яғы сикләнмәгән киңлек; арауыҡ. *Һауа пространствоһы.* / *филос.* Материяның күләм һәм дәүмәл менән билдәләнгән булмыш формаларының береһе.

**ПРОСТЫНЯ** [*рус.*] *и. ҡар.* **япма** 2.

**ПРОТЕЗ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Яһалма ағза (ҡул, аяҡ, теш һ. б.). *Аяҡ протезы. Теш протезы. Протез ҡуйыу. Протез яһау. Протез менән йөрөү.*

**ПРОТЕЗЛАУ** *ҡ.* Протез менән тәьмин итеү, протезлы итеү; протез ҡуйыу.

**ПРОТЕЙН** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. биохим.* Тереклек организмының һәм үҫемлектең айырым күҙәнәге булып торған ябай аҡһым, нигеҙ.

**ПРОТЕКТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Пневматик шин покрышкаһының тышҡы ҡалын, ҡаты ҡатлауы.

**ПРОТЕКТОРАТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Эске эштәрҙә ҡайһы бер үҙаллылығын һаҡлап, көслө капиталистик дәүләт бойондороҡонда булған ил.

**ПРОТЕКЦИОНИЗМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. эк.* Дәүләттең милли экономиканы сит ил конкуренцияһынан һаҡлауға йүнәлтелгән экономик политикаһы. *Үҫеш алған илдәрҙең протекционизмы.*

**ПРОТЕКЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Кемдеңдер берәй эшен рәтләү өсөн кемдер тарафынан күрһәтелгән йоғонтоло ярҙам. *Протекция алыу. Протекция биреү.*

**ПРОТЕСТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Нимәгәлер күрһәтелгән ҡаты ҡаршылыҡ. *Протест белдереү. Протест яһау.*

**2.** Ни менәндер килешмәгәнлекте күрһәткән рәсми белдереү. *Прокурор протесы.*

**ПРОТЕСТАНТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Протестантлыҡ динендәге кеше.

**ПРОТЕСТАНТЛЫҠ** *и.* Христиан диненән 16 быуаттағы реформация һөҙөмтәһендә католицизмға ҡаршылыҡ күрһәтеү рәүешендә барлыҡҡа килгән йүнәлеше.

**ПРОТИВОГАЗ** [*рус.*] *и.* Ағыулы матдәләрҙән, төтөндән тынды һаҡлау өсөн кейелә торған фильтрлы битлек.

**ПРОТОКОЛ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Йыйылышта, ултырышта, һорау алғанда әйтелгән бөтә һүҙ, бөтә эш һәм ҡарарҙы теркәгән документ. *Протоколға теркәү. Протокол яҙыу.*

**2.** Берәй фактты дөрөҫләгән документ. *Протокол төҙөү.*

**3.** Йәмәғәт тәртибен, законды боҙоу тураһындағы акт. *Эверсиан баяры Ғөмәр ауылы башҡорттарының урманын тартып ала. Башҡорттар урманды ҡырҡа башлағас, полицмейстр .. улар өҫтөнән протокол төҙөй. Шул протокол буйынса башҡорттар судҡа тарттырыла.* З. Шәрҡи.

**4.** *дип.* Халыҡ-ара килешеү акты.

**ПРОТОН** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. физ.* Матдәнең водород атомы ядроһы бер ыңғай электр зарядынан торған элементар өлөшсәһе.

**ПРОТОПЛАЗМА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. биол.* Тереклек һәм үҫемлек күҙәнәктәренең уларҙа барған йәшәү процесының нигеҙен тәшкил иткән матдәһе.

**ПРОТОТИП** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Әҙәби персонажға өлгө итеп алынған кеше.

**ПРОФАКТИВ** [*рус.*] *и.* Профсоюз активы.

**ПРОФБЮРО** [*рус.*] *и.* Профсоюз ойошмаһының бюроһы.

**ПРОФЕССИОНАЛ** [*рус.*] *и.* Берәй эште үҙ һөнәре, профессияһы итеп алған кеше.

**ПРОФЕССИОНАЛЬ** [*рус.* профессиональный] *с.* **1.** Профессия сәбәп булған, профессия барлыҡҡа килтергән. *Профессиональ ғәҙәт. Профессиональ ауырыу.*

**2.** Профессионалға мөнәсәбәтле. *Профессиональ фотограф. Профессиональ артист.* ■ *Башҡорт АССР-ында профессиональ сәнғәтте һәм халыҡтың художество ижадын үҫтереү бөтә саралар менән дәртләндерелә.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

♦ **Профессиональ союз** *ҡар.* **профсоюз.**

**ПРОФЕ́ССИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Кешенең тейешле әҙерлек үтеп, төп эш итеп алған хеҙмәте; һөнәр. *Профессия алыу. Профессияны алмаштырыу. Профессия һайлау.* ■ *[Сарбаевтың] һуғышка тиклемге профессияһы — драматик артист, ҡурайсы.* С. Агиш.

**ПРОФЕ́ССОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Юғары уҡыу йортоноң квалификациялы уҡытыусыларына, ғилми-тикшеренеү ойошмаһының ғилми эшкә етәкселек иткән хеҙмәткәрҙәренә бирелә торған иң юғары дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше.

**ПРОФИЛАКТИК** *с.* Профилактика өсөн тәғәйенләнгән, хеҙмәт итә торған. *Профилактик саралар. Профилактик эштәр.*

**ПРОФИЛА́КТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Ауырыуҙы киҫәтеү өсөн алдан күрелгән сара.

**2.** Берәй нәмәне иртә боҙолоуҙан, туҙыуҙан һаҡлау сараһы.

**ПРОФИЛАКТО́РИЙ** [*рус.*] *и.* Эштән айырмайынса санатория шартында дауалау өсөн булған профилактик медицина учреждениеһы. *Күп кенә фермаларҙа медицина профилакторийҙары һәм ашханалар асылды.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 21 ғинуар.

**ПРО́ФИЛЬ** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Бит йәки бер нәмәнең ҡабырға яҡ күренеше. *Фотоға профилдән төшөрөү.*

**2.** Эште, хужалыҡты билдәләгән типик һыҙат. *Авиация институты бәләкәй генә уҡыу йортонан күп профилле ҙур уҡыу үҙәгенә әүерелде.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 28 ғинуар.

**ПРОФКО́М** [*рус.*] *и.* Урындағы профсоюз ойошмаһының комитеты.

**ПРОФО́РГ** [*рус.*] *и.* Профсоюз группаһы етәксеһе.

**ПРОФСОЮ́З** [*рус.*] *и.* Эшсе һәм хеҙмәткәрҙәрҙе хеҙмәт принцибы буйынса берләштереп, уларҙың мәнфәғәтен күҙәткән ойошма. *Профсоюз билеты. Профсоюз йыйылышы. Профсоюз ойошмаһы.*

**ПРОХОДНО́Й** [*рус.* проходная] *и.* Предприятиеға инә торған урын.

**ПРОЦЕДУ́РА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Берәй эште башҡарыу тәртибе. *Договорға ҡул ҡуйыу процедураһы. Тауыш биреү процедураһы.*

**2.** Врач билдәләгән дауаланыу сараһы. *Физиотерапевтик процедура. Һыу процедураһы. Процедураға йөрөү.*

**ПРОЦЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Һандың бер бөтөн итеп алынған йөҙҙән бер өлөшө (% тамғаһы менән билдәләнә). / Бер берәмектең йөҙҙән бер өлөшө менән иҫәпләнгән нәмә һаны.

**2.** Капиталдың һәр 100 һумынан алынған килем. *Процент алыу.*

**3.** Ссудаға алған аҡса өсөн кредиторға түләй торған хаҡ. *Проценты менән ҡайтарыу.*

**4.** Доходҡа ҡарап түләнгән эш хаҡы. *Үҫтерелгән иген хаҡының процентын өҫтәмә түләү итеп биреү.*

**ПРОЦЕ́СС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Төрлө эш, хәл күренештең эҙмә-эҙлекле барышы. *Ижади процесс. Уҡыу процессы. Үҫемлектәрҙең үҫеү процессы. Эш процессы.* / Билдәле бер һөҙөмтәгә йүнәлтелгән эҙмә-эҙлекле эштәр. *Нефть сығарыу процессы. Етештереү процессы. Технология процессы.*

**2.** *юр.* Суд эшен ҡарау тәртибе, суд эше. *Ғәли Әкбәров икеләнеүҙәрҙең бушҡа булмағанлығын процесс барышында, бигерәк тә суд аҙағында асыҡ күрҙе.* Х. Зарипов.

**ПРОЦЕ́ССИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Күп кеше ҡат нашлығындағы тантаналы йөрөш.

**ПРОШЕ́НИЕ** [*рус.*] *и. иҫк. ҡар.* **ғариза.**

**ПРОЯВИ́ТЕЛЬ** [*рус.*] *и. фото* Пленкаға төшөрөлгән фотоны күренер хәлгә килтерә торған состав.

**ПРУЖИ́НА** [*рус.*] *и.* Баҫымды кире ҡайтарып торған һығылмалы ҡорос спираль йәки пластинка. *Матрас пружинаһы. Сәғәт пружинаһы.* ■ *[Сәлим:] Бына һеҙгә ҡарауат. Матрасы пружиналы.* Н. Иҙелбай.

**ПРУЖИНАЛЫ** *с.* Пружина ҡуйып эшләнгән, пружина менән тәьмин ителгән. *Пружиналы матрас.*

**ПСЕВДОНИ́М** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ижад кешеләре үҙенә алған ҡушамат исем; ялған исем.

**ПСИХИА́ТР** [*рус.*] *и.* Психиатрия буйынса белгес, врач.

**ПСИХИАТРИК** *с.* Психиатрияға мөнәсәбәтле. *Психиатрик больница.*

**ПСИХИАТРИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Медицинаның психик ауырыуҙарҙы, уларҙы киҫәтеү һәм дауалау методтарын өйрәнә торған тармағы.

**ПСИХИК** *с.* Психикаға мөнәсәбәтле. *Психик үҙенсәлек. Психик эшмәкәрлек.*

♦ **Психик атака** оборонала тороусыларҙы ҡурҡытыу, рухын төшөрөү ниәте менән яһалған атака. **Психик ауырыу** нервы системаһының, мейенең боҙолоуы арҡаһында барлыҡҡа килгән ауырыу.

**ПСИ́ХИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тере организмдарҙың ысынбарлыҡты һиҙеү, ҡабул итеү, тойоу, ә кешелә шулай уҡ фекерләү һәм ихтыяр аша сағылдырыу һәләте. / Кешенең күңел төҙөлөшө.

**ПСИХО́З** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Баш мейеһенең зарарланыуынан килгән ауырыу хәл.

**ПСИХО́ЛОГ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Психология буйынса белгес.

**2.** Кешенең психологияһын яҡшы белгән кеше.

**ПСИХОЛОГИ́ЗМ** [*рус.*] *и. кит.* **1.** Социаль мөнәсәбәтте кешеләрҙең психологик үҙенсәлектәре нигеҙендә аңлатҡан буржуаз социологияға хас методологик ысул.

**2.** Психик, күңел кисерештәренең тәрәнәйтелгән һүрәтләнеше.

**ПСИХОЛОГИК** *с.* **1.** Психологияға мөнәсәбәтле. *Психологик анализ. Психологик закон. Психологик күҙәтеү.*

**2.** Персонаждарҙың психологияһын тәрән итеп күрһәтергә ҡороулы. *Психологик драма. Психологик роман.*

**ПСИХОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Психик эшмәкәрлектең закон буйынса булыуы, үҫеше һәм формалары тураһындағы фән. *Дөйөм психология. Психологияның тармаҡтары.*

**2.** Төрлө эшкә хас булған психик процестар. *Сәнғәт психологияһы. Хеҙмәт психологияһы.*

**3.** Айырым кешенең тәбиғәтенә хас булған психик үҙенсәлек. *Крәҫтиән үҙе, уның психологияһы һәм культураһы танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 4 ноябрь.

**ПСИХОПА́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Психик ауырыулы кеше.

**ПСИХОПА́ТИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Психиканың нормаль булмауы, ауырыуы.

**ПСИХОПАТО́ЛОГ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Психопатология буйынса белгес.

**ПСИХОПАТОЛОГИК** *с.* Психопатологияға мөнәсәбәтле. *Психопатологик тикшеренеү.*

**ПСИХОПАТОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Медицинаның психик эшмәкәрлек барлыҡҡа килеү, табылыуының дөйөм закондарын һәм кәйеф боҙолоу ағыштарын өйрәнә торған тармағы.

**ПСИХОТЕРАПИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Психик тәьҫир менән дауалау ысулы.

**ПУ́БЛИКА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ниҙер тыңлаған, тамаша иткән халыҡ. *Мин тағы «Буранбайҙы» башланым.. Публика был юлы ҡул сапманы, бөтәһе лә башын эйгән ине.* Д. Юлтый.

**ПУБЛИЦИ́СТ** [*рус.*] *и.* Ижтимағи-политик мәсьәләләр буйынса яҙған кеше.

**ПУБЛИЦИСТИК** *с.* Публицистикаға мөнәсәбәтле, публицистикаға хас. *Публицистик жанр. Публицистик мәҡәлә.*

**ПУБЛИЦИ́СТИКА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Актуаль темаға ҡарата булған ижтимағи-политик әҙәбиәт; әҙәби жанр. / Ижтимағи-политик әҫәрҙәргә хас стилдең бүтән жанрҙа осраған һыҙаттары.

**2.** *йыйн.* Шул жанр әҙәбиәте.

**ПУГА́Ч** [*рус.*] *и.* Шартлай торған уйынсыҡ пистолет. *Ғабдрахман каникулға пугач алып ҡайтҡайны, шуның менән балалар ҡурҡытып йөрөнө.* И. Ғиззәтуллин.

**ПУ́ДИНГ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Бутҡаға, эремсеккә тәм-том ҡатнаштырып, ҡалын итеп йәйеп, мейестә ҡатырған ашамлыҡ.

**ПУ́ДРА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* *ҡар.* **буҙыр.**

**ПУДРАЛАУ** *ҡ.* *ҡар.* **буҙырлау.**

**ПУЛ** *и.* *иҫк.* *ҡар.* **бол** [1] 1. *Харам пул менән хаж ҡылып, кафырҙарҙы көлдөрҙөң* (Бәйеттән).

**ПУЛАТ** [*рус.* палата] *и.* Ҙур матур йорт; һарай. *Таш пулат.* ■ *Бир һин миңә, туған, көн-төн эшләп таш пулаттар һалған ҡулыңды.* М. Ғафури.

**ПУЛЕМЁТ** [*рус.*] *и.* Пуля менән тиҙ-тиҙ ата торған автоматик ҡорал. *Зенит пулемёт. Станоклы пулемёт. Ҡул пулемёты. Пулемёт таҫмаһы.*

**ПУЛЕМЁТСЫ** *и.* Пулемёттан атыусы.

**ПУЛЬВЕРИЗА́ТОР** [*рус.*] *и.* *ҡар.* **бөркөүес.**

**ПУЛЬС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡан тамырҙарының йөрәктең тибеше менән ҡыуылған ҡан аша һуғып тороуы. *[Сәгиҙә баланың] ҡул тамырын һәрмәне, пульсы һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә тибә ине.* М. Тажи. / Ҡан тамырының тибешен тотоп ҡарай торған урын. *Пульсты баҫып ҡарау.*

**ПУЛЬТ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Төрлө аппаратураға идара итеү приборҙары ҡуйылған өҫтәл йәки таҡта. *Диспетчер пульты. Идара пульты.*

**2.** Нота ҡуя торған бейек аяҡлы ҡыя таҡта. *Дирижёр пульты.*

**ПУ́ЛЯ** [*рус.*] *и.* Винтовка, револьвер һәм пулемёттан атыла торған ҡурғашлы бәләкәй йәҙрә. *Мылтыҡ-пулемёттарҙан атылған пуляләр окоп өҫтөнә ямғыр кеүек яуа.* Д. Юлтый.

**ПУ́МА** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* Бесәйҙәр ғаиләһенән булып, Көньяҡ һәм Төньяҡ Америка урмандарында йәшәгән йыртҡыс йәнлек.

**ПУНКТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ниндәйҙер әһәмиәте булған билдәле бер урын. *Стратегик пункт.*

**2.** Берәй эш өсөн тәғәйенләнгән урын. *Ветеринария пункты. Команда пункты. Күҙәтеү пункты. Ҡабул итеү пункты. Прокат пункты. Санитария пункты. Әҙерләүҙәр пункты.*

**3.** Тексттың номер йәки хәреф менән билдәләнгән бүлеге. *Беренсе пункт. Өс пункттан торған ҡарар.*

**4.** Ниҙеңдер барышы йәки үҫешендәге айырым хәл. *Кульминация пункты.*

**5.** Типографияла: хәрефте һәм юл араһын үлсәй торған берәмек.

**ПУНКТИ́Р** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Нөктәләрҙән йәки ҡыҫҡа-ҡыҫҡа һыҙыҡсанан торған һыҙыҡ. *Пунктир менән билдәләү.*

**ПУНКТИРЛАУ** *ҡ.* Пунктир рәүешендә итеү.

**ПУНКТУА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* *грам.* Тыныш билдәләренең ҡуйылыш системаһы. *Пунктуация ҡағиҙәләре.*

**ПУТЁВКА** [*рус.*] *и.* **1.** Эшкә, уҡырға, ялға тәғәйенләп ебәрелгән кешенең ҡулына бирелә торған рәсми ҡағыҙ. *Туристик путёвка. Санаторий путёвкаһы.*

**2.** *махс.* Маршруты һәм тейешле эше күрһәтелеп, транспорт йөрөтөүсенең ҡулына бирелә торған рәсми ҡағыҙ.

◆ **Тормош путёвкаһы** эшкә, тормошҡа йүнәлеш биргән белем, күнекмә. *Фатима институтты тамамлап, тормош путёвкаһы алып, тәү тапҡыр эшкә киткән мәлдә лә сыуаҡ яҙ ине.* А. Игебаев.

**ПУФ** *окш.* Атылып сыҡҡан боҫ, һауа һ. б. тауышын белдергән һүҙ. *Пуф итеү.*

**ПУФ-ПУФ, пуф та пуф** *окш.* Ҡабат-ҡабат пуф иткән тауышты белдергән һүҙ. *Пуф-пуф итеү. Пуф та пуф килеү.* ■ *Ут өҫтөндә сәйнүк тора, пуф-пуф итеп ул быу бөркә.* Р. Басимов.

**ПУФЫЛДАУ** *ҡ.* Пуф-пуф итеү, пуф та пуф килеү. *Пуфылдығы сығыу.*

**ПУ́ШКА** [*рус.*] *и.* Оҙон көбәкле артиллерия ҡоралы; туп. *Пушка ҡойоу. Пушканан атыу.* / Төрлө артиллерия ҡоралының исеме. *Зенит пушкаһы. Танк пушкаһы.*

**ПҮНӘТӘЙ** [*рус.* понятой] *и.* *иҫк.* *һөйл.* Тентеү яһағанда, мөлкәтте яҙғанда һ. б. власть органдары тарафынан ситтән ҡатнаштырылған кеше; шаһит.

**ПЫР** [1] *окш.* Ҡапыл осҡан ваҡ ҡоштоң ҡанат тауышын белдергән һүҙ; быр, фыр. *Турғай пыр итеп осоп китә* (Әкиәттән).

**ПЫР** [2]: **пыр туҙҙырыу** 1) еңел нәмәне ойоҡһотоп осороу. *Һары һаламдарҙы пыр туҙҙырып,*

*дыуылдатып ашлыҡ һуғалар.* Ғ. Мәсғүд. *Пар атын суклап, тағып ҡуш ҡыңғырау, пыр туҙҙырып, эй килер ҡунаҡ йыйынға, ҡуҙҙәр ҡыҙҙырып.* Ш. Бабич; 2) тырым-тырағай килтереү, пыран-заран итеү. *[Иркәбай:] Беҙ әле үрге ос малайҙарын пыр туҙҙырып ҡайттыҡ.* Д. Юлтый. *Ер шары капиталын пыр туҙҙырайыҡ аҡтарып.* Т. Йәнәби; 3) ныҡ итеп әрләү, тетмәһен тетеү. *Орҡоя ҡыҙмаса булып алған ире Усманды пыр туҙҙырып күпеға алып инә.* Н. Иҙелбай. **Пыр туҙыу** 1) зыҡ ҡубып, бер эш менән мәшғүл булыу. *Өҫтәл өҫтөн кала яһап октябряттар пыр туҙа.* С. Агиш. *Революцион комитет пыр туҙып эшләп ята.* И. Насыри; 2) ныҡ асыуланып әрләү; дыулау. *[Хужа] берәй ғәйебеңде күрһә, йәнеңде алырҙай булып асыулана, пыр туҙа.* Ғ. Ғүмәр.

**ПЫРАН-ЗАРАН: пыран-заран килеү** 1) аҫты-өҫкә килеп туҙыу; боларыу. *Бөтә нәмә пыран-заран килгән.* С. Кулибай; 2) аҫты өҫкә килеп юҡҡа сығыу. *Сөләймән Баҡырғани китабында тасуир ителгән «ахыр заман» ваҡиғалары үҙенән-үҙе юҡҡа сыҡҡан, пыран-заран килгән.* Ә. Харисов. **Пыран-заран килтереү** (*йәки* **итеү**) 1) аҫтын өҫкә килтереп туҙҙырыу; болартыу. *Айыу инеп, умарталыҡты пыран-заран килтергән* (Әкиәттән); 2) туҙҙырып юҡҡа сығарыу; тар-мар итеү. *«Нафиков та ныҡ һуғыша,— тине полковник,— тылға ингән немецтарҙы пыран-заран килтерҙе».* Ә. Ихсан.

**ПЫРЛАУ** *ҡ.* **1.** Пыр итеү, пыр килеү; фырлау. *Ҡайһы сакта улар [һандуғастар] пырлап Иҙел аша осоп китә, ағас араһына инеп юҡ була.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *күсм.* Асыуланып, ҡыҙып китеп, әрләргә керешеү. *Бибиғәйшә карсыҡ .. пырлай, һис төшөрлөк түгел көйөнә.* Т. Арслан.

**ПЫР-ПЫР, пыр ҙа пыр** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат пыр иткән тауышты белдергән һүҙ; быр-быр. *Пыр-пыр итеү. Пыр ҙа пыр килеү.* ■ *Йәшәрһен сахра һәм ҡыр, ҡоштар осһон пыр ҙа пыр.* Ш. Бабич.

**ПЫРТМАНИТ** [*рус.* портмоне ⟨ *фр.*] *и.* *һөйл.* Аҡса янсығы.

**ПЫРХ** *оҡш.* Тыйыла алмай ҡапыл көлөп ебәргәндә белдергән һүҙ; бырх. *Пырх итеү.* ■ *Барлыҡ балалар пырх итеп көлөп ебәрҙе. Уҡытыусы ағай ғына көлөргә лә, асыуланырға ла белмәне.* Б. Бикбай.

**ПЫРХ-ПЫРХ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат пырх иткәндә белдергән һүҙ; бырх-бырх. *Пырх-пырх килеү.*

**ПЫРХЫЛДАУ** *ҡ.* Пырх-пырх итеү, пырх-пырх килеү; бырхылдау. *Пырхылдыға сығыу. Пырхылдап көлөү.*

**ПЫРХЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **пырхылдау.**

**ПЫРЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Пыр-пыр иттереү, пыр-пыр килтереү.

**ПЫРЫЛДАУ** *ҡ.* Пыр-пыр итеү, пыр-пыр килеү; фырылдау.

**ПЫРЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **пырылдау.**

**ПЫРШАЙЫУ** *ҡ. диал.* Ҡылтайыу.

**ПЫТ-ПЫТ** *оҡш.* Машина моторы тоҡаныр-тоҡанмаҫ торғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; быт-быт. *Машина тәүҙә тотлоғоп, пыт-пыт итеп торҙо.* А. Таһиров.

**ПЫТЫР** *оҡш.* Мотор ҡапыл тоҡанып киткәндә йәки автоматик ҡоралдан оҙон итеп атҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; бытыр. *Пытыр итеү.*

**ПЫТЫРЛАТЫУ** *ҡ.* Пытыр-пытыр иттереү, пытыр-пытыр килтереү; бытырлау.

**ПЫТЫРЛАУ** *ҡ.* Пытыр-пытыр итеү, пытыр-пытыр килеү.

**ПЫТЫРЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **пытырлау.**

**ПЫТЫР-ПЫТЫР** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат пытыр иткән тауышты белдергән һүҙ; бытыр-бытыр. *Пытыр-пытыр итеү. Пытыр-пытыр килеү.* ■ *[Алёшка:] Хәҙер бынауҙарҙың [аҡтарҙың] өҫтөнә ябырылырға ине.. Пытыр-пытыр һиптерергә ине максимканан!* З. Биишева.

**ПЫФ** *оҡш.* Ҡыҫылып сыҡҡан боҫ, һауа һ. б. тауышын белдергән һүҙ. *Пыф итеү.*

**ПЫФЛАУ** *ҡ.* Пыф итеү. *Сестра ауыҙын торбаландырып, пыфланы ла бер һүҙ өндәшмәне.* А. Таһиров.

**ПЫФ-ПЫФ, пыф та пыф.** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат пыф иткән тауышты белдергән һүҙ. *Пыф-пыф итеү. Пыф-пыф килеү.*

**ПЫФЫЛДАУ** *ҡ.* Пыф-пыф итеү, пыф-пыф килеү.

**ПЫХЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Боҫ, газ бөркkәндә өҙөк-өҙөк тоноҡ тауыш сығарыу (машинаға ҡарата). *Хисам вагондарға, пыхылдап торған ысын паровоздарға шаҡ ҡатып ҡарай ине.* Б. Бикбай.

**2.** *диал.* Быхылдау. *Йыуан управляющий бик ашығып, пыхылдап конторага килеп инде.* Һ. Дәүләтшина.

**ПЫШ** *оҡш.* Ҡыҫылып сыҡҡан боҫ, һауа һ. б. тауышын белдергән һүҙ. *Пыш итеү.*

**ПЫШ-ПЫШ, пыш та пыш** *оҡш.* **1.** Ҡабат-ҡабат пыш иткәндә белдергән һүҙ. *Паровоз пыш-пыш итеп ултыра. Пыш-пыш килеү.*

**2.** *ҡар.* **быш-быш.**

**ПЬЕДЕСТА́Л** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Статуя, обелиск кеүек нәмәнең нигеҙе. *Бронза һәйкәл баҫҡан пьедестал төбөнә алмаш-тилмәш баҫып ораторҙар һөйләй.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 27 апрель.

**ПЬЕ́СА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Театрҙа ҡуйыу өсөн яҙылған драма әҫәре. *Бөтәһе лә бар, пьеса ғына юҡ ине. Беҙ пьеса булмай тороп спектакль ҡуйып булмай тигән хәҡиҡәтте лә аңланыҡ.* С. Агиш.

**2.** Ҙур булмаған музыка әҫәре.

**ПӘДӘР** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Атай. *Ҡыпсаҡ уҙе Лоҡман Хәким нәҫеленән, уның пәдәре Уғыҙхан урҙаһында сәрғәскәр булған.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ПӘЖЕ** *и. диал.* Киндер.

**ПӘЖЕҮ** *ҡ. диал. ҡар.* **быжыу** 1.

**ПӘЙҒӘМБӘР** [*фарс.*] *и.* Дини хөрәфәтсә, алланың теләген, шартын башҡарып торған әҙәми зат; алланың илсеһе.

♦ **Пәйғәмбәр тырнағы** *ҡар.* **тырнаҡ.**

**ПӘЙҘӘ** [*фарс.*]: **пәйҙә булыу** барлыҡҡа килеү. *Артымда ҡара шәүлә пәйҙә булды.* З. Хисмәтуллин.

**ПӘРҘӘ** [*фарс.*] *и.* **1.** Ниҙелер ҡаплап, ҡороп ҡуйыған туҡыма; ҡорма. *Селтәрле пәрҙә. Тәҙрә пәрҙәһе.* / *күсм.* Ниҙелер ҡаплап, томалап торған нәмә. *Ҡараңғылыҡ пәрҙәһе. Төн пәрҙәһе.*

*Төтөн пәрҙәһе.* ■ *Күк йөҙөндә төркөм-төркөм ҡара болот ил өҫтөн ҡаплаған пәрҙә булып.* Ғ. Хәйри. / *күсм.* Ниҙелер йәшереп, баҫырып торған шарт. *Мин донъяға туранан-тура, пәрҙәһеҙ ҡарай башланым.* И. Насыри.

**2.** Сәхнә эҫәрҙәренең бер бүлеге; шаршау. Бер пәрҙәле пьеса.

**3.** *ҡар.* **йөҙлөк** [1] 1.

**4.** *диал. ҡар.* **шәкәрә** 2.

**5.** *диал. ҡар.* **ҡаҫмаҡ** 3.

♦ **Күкрәк пәрҙәһе** *диал. шул уҡ* **күкрәк шаршауы** (*ҡар.* **күкрәк**). **Ҡолаҡ пәрҙәһе** *шул уҡ* **ҡолаҡ ярыһы** (*ҡар.* **ҡолаҡ** 1).

**ПӘРҘӘЛӘНЕҮ** *к. төш. ҡар.* **пәрҙәләү.**

**ПӘРҘӘЛӘҮ** *к.* Ниҙелер ҡаплау, томалау. *Уйсан ерҙең битен пәрҙәләп, ай нурҙарын түгеп һөйөнә.* Ә. Ихсан.

**ПӘРЕЙ** *и. ҡар.* **бәрей.**

**ПӘРУА** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Тәрбиә, хәстәр. *Фәҡир меҫкенгә пәруа юҡ, мәҙәлләт берлә зар әйләр.* Р. Фәхретдинов.

**ПӘРӘЙЕЗ** *и. ҡар.* **пирәйәз.**

**ПӘРӘНЖӘ** [*ғәр.*] *и.* Элекке Урта Азиялағы ҡатын-ҡыҙҙың оҙон ялған еңле һәм йөҙөн ҡаплау өсөн сәстән эшләнгән бөркәнсекле халат рәүешендәге кейеме. *Башҡорт ҡыҙы әсе сеңләгән, тик һис кемгә башын эймәгән, йөҙгә пәрәнжә лә киймәгән.* Ғ. Әмири.

**ПӘРӘНЙӘ** *и. ҡар.* **пәрәнжә.**

**ПӘРӘСТ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Бер нәмәне ныҡ яратҡан, табынған кеше. *Ғисмәтуллин — шалтырауыҡ, ялтырауыҡ дан пәрәст. Йә илаһи, беҙҙе әйлә дан пәрәстәрҙән хәләс.* Ш. Бабич.

**ПӘРӘҮЕЗ** [*фарс.*] *и. диал.* Үрмәксе ауы.

**ПӘСТ** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Быҫраҡ, әшәке. / *күсм.* Түбән, хурлыҡлы.

**ПӘҺЛЕУАН** *и. ҡар.* **бәһлеүән.**

**ПӘШИМАН** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Үткән нәмәгә ҡайғырыусы, үкенеүсе. *Сират күпере бөтә донъяға фаш был, хоҙай индермәһен инде уны төшкә, пәшимандар ошо көн төшкән эшкә.* М. Ғафури.

**ПЮПИТР** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Нота, китап һ. б. нәмә ҡуйыу өсөн таяуға ултыртылған ҡыя таҡта.

# Р

**Р** [эр] Башҡорт алфавитының егерме өсөнсө хәрефе.

**РАБАТКА** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* Стена йәки юл буйлатып яһалған оҙон сәскә түтәле. *Йәйге кәнәфер бәләкәй клумбаларҙа, рабаткаларҙа үҫтерелә.*

**РАББИ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Алла, тәңре, хоҙай. *Асыуҙарҙан имен ит ошо дүрт агзамды, рабби: береһе башым, береһе ҡолаҡ, береһе күҙем, береһе телем* (Мөнәжәттән). **Я рабби** аллаға мөрәжәғәт иткәндә әйтелә. *[Тайба:] Я рабби, теңкәгә генә тейеп бөттө лә баһа был һуғыш тигән нәмәләре!* З. Биишева.

**РАББЫ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Хужа, эйә.

**2.** Алла, тәңре, хоҙай. *[Иблис:] Орлоғом һиптем уларҙың күлбенә, ҡаршы килһендәр өсөн раббы әмеренә.* Ш. Бабич. **Раббы әл-ғаләмин** ғаләм хужаһы; алла. *Күрәҙә түйып кикерҙе лә, шөкөр итеп: «Әл-хәмде әл-иллаһи, раббы әл-ғаләмин»,— тине.* Я. Хамматов. **Раббы әл-фәләк** күк хужаһы; алла. *Азат итһә берәүҙе раббы әл-фәләк, ҡалыр тау аҫтында, унан сығыр пак.* М. Ғафури.

**РАББЫМ** *и. иҫк. кит. ҡар.* **рабби.** *Бигерәк тә әбейҙәр өҙөләләр: — Эй хоҙайым, ҡырау һуҡтымы, тупалам тейҙеме, был ни эш был, раббым.* Һ. Дәүләтшина.

**РАБИҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Яҙ миҙгеле.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**РАБИҒЫЛАХЫР** [*ғәр.*] *иҫк.* Ай календарының дүртенсе айы (*ҡар.* **календарь**).

**РАБИҒЫЛӘССАНИ** [*ғәр.*] *иҫк. ҡар.* **рабиғылахыр.**

**РАБИҒЫЛӘҮҮӘЛ** [*ғәр.*] *иҫк.* Ай календарының өсөнсө айы (*ҡар.* **календарь**).

**РАБКООП** [*рус.*] *и.* Эшсе потребителдәр кооперацияһы. *Үткән йыл .. Краснознаменка рабкоопы тимер юл вагонына бына тигән эре картуф тейәтте.* Р. Хәкимов. *«Йылайыр» совхозы үткән йылдарҙа рабкоопҡа 4 магазин төҙөп бирҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 18 июнь.

**РАБКОР** [*рус.*] *и.* Эшсе хәбәрсе. *«Известия» газетаһы үҙенә байтаҡ ҡына подписчиктар йыйып, ялпы менән, беренсе рабкор, селькорҙар менән, бәйләнеш башланы.* Т. Йәнәби.

**РАБОТНИК** *и. ҡар.* **хеҙмәткәр.** *Газета работниктары. Номенклатур работниктар.* ■ *Партия работнигы үҙенең күп ваҡытын .. хеҙмәт коллективтарында үткәрергә, кешеләрҙең кәйефен белергә, кәрәк саҡта шәхси өлгө күрһәтергә тейеш.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 27 май.

**РАБФАК** [*рус.*] *и.* **1.** 1919—1940 йылдарҙа СССР-ҙа урта белеме булмаған йәштәрҙе вузға әҙерләгән дөйөм белем мәктәбе. *Рабфак бөтөрөү.* ■ *Насар бирһәм әгәр зачётты .. мөхәббәтем минең менән китмәҫ, шул рабфакта ҡалыр сибәрем.* Ғ. Хәйри.

**2.** 70-се йылдарҙан башлап СССР-ҙа эш стажы булған йәштәрҙе вузға әҙерләгән юғары уҡыу йорто эргәһендәге бер йыллыҡ курс.

**РАГУ** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Итте һөйәкле көйө турап, ярма йәки йәшелсә менән бергә быҡтырып бешергән ашамлыҡ. *Завод ашханаһында Әҙелгәрәйҙең ашағанын күҙәтеп ултырҙым: рагу һөйәктәрен шытырлатып кимерә.* А. Ғирфанов. **Йәшелсә рагуһы** төрлө йәшелсәне турап быҡтырған ашамлыҡ.

**РАДАР** [*рус.* ‹ *ингл.*] *и. ҡар.* **радиолокатор.** *Метеорологик радар. Радар установкаһы.* ■ *Тыңлашаһе ине заманымдың һағындағы һиҙгер радарға.* Р. Бикбаев.

**РАДИАЛЬ** [*рус.* радиальный] *с.* Радиус буйлап ятҡан, радиус буйлап йүнәлгән. *Радиаль симметрия.*

**РАДИАТОР** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* **1.** Эстән яғыулы двигателдәрҙә һыуҙы йәки майҙы һыуыта торған ҡорамал. *Машина радиаторы. Самолёт радиаторы.* ■ *Раушл биҙрәләге һыуҙы радиаторға ҡойҙо.* Ә. Вәли. *Самолёт ҡалтыранып ҡуйҙы: снаряд ярсығы май радиаторын тишкән.* «Ағиҙел», 1980, № 5.

**2.** Эсендә эҫе һыу йәки пар йөрөгән торбалар системаһынан торған йылытҡыс ҡорамал. *Пар йылытҡыслы радиатор. Һыу йылытҡыслы радиатор.*

**РАДИА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. физ.* **1.** Берәй есемдән таралған электромагнит һәм тауыш тулҡындары, шулай уҡ элементар өлөшсәләр йәки атом ядролары ағымы. *Радиация тәьҫире.*

**2.** Ниҙеңдер үҙәктән радиус йүнәлешендә таралыуы.

♦ **Радиация бүлкәте** *махс.* Ерҙең магнит майҙанындағы электрондар һәм протондар тупланған өлкәһе.

**РА́ДИЙ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Химик элемент, радиоактив үҙенсәлекле металл.

**РАДИКА́Л** [1] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Киҫкен сара һәм ҡараш яҡлы кеше.

**2.** Радикализм (2 мәғ.) яҡлы кеше. *Радикалдар партияһы.*

**РАДИКА́Л** [2] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *мат.* Тамыр табыу ғәмәлен билдәләгән тамға ($\sqrt{\ }$) һәм шул ғәмәлдең һөҙөмтәһе.

**2.** *хим.* Молекулала бер химик берләшмәнән икенсеһенә үҙгәрмәй күсә торған тотороҡло атомдар төркөмө.

**РАДИКАЛИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* **1.** Теоретик һәм практик мәсьәләләрҙә хәл итеү эшендәге киҫкен сара һәм ҡараштар йүнәлеше. *Радикализм тенденцияһы.*

**2.** Буржуаз дәүләт шарттарында демократик реформалар үткәреү яғында торған буржуаз йәки ваҡ буржуаз ағым.

**РАДИКАЛЬ** [*рус.* радикальный] *с.* **1.** Төп нигеҙгә ҡағылышлы; тәрән, төп, хәл иткес. *Радикаль үҙгәрештәр. Мәсьәләне радикаль хәл итеү.*

**2.** Радикалдарға [1] (2 мәғ.) хас. *Радикаль ҡараш.* / Киҫкен саралар ҡулланыуҙы яҡлаған. *Радикаль эшмәкәр.* // *Йәмғиәтте ҡәбәхәтлектән һәм әшәкелектән радикаль рәүештә таҙартыу.*

**РАДИКУЛИ́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. мед.* Арҡа мейеһендәге нервы тамырҙарының шешеүе. *Радикулит .. һыуыҡ тейгәс кенә белинә.* В. Ғүмәров.

**РА́ДИО** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Электромагнит тулҡындары ярҙамында тауышты алыҫ араға сымһыҙ тапшырыу һәм ҡабул итеү ысулы; шул ысулдағы элемтәне өйрәнгән фән һәм техника өлкәһе. *Радионы өйрәнеү. Радионы уйлап табыу.*

**2.** Шул ысул менән телмәрҙең һәм музыка программаларының башҡарылышы. *Радионан концерт тыңлау.* ■ *Сара Садикованың тиҫтәләгән йырҙары радио, телевидение .. аша бөйөк илебеҙҙең төрлө мөйөштәрендә яңғырай.* Ғ. Рамазанов. / Шундай тапшырыуҙарҙы башҡарған ойошма. *Башҡортостан радиоһы. Радио журналисы. Радио хеҙмәткәре.*

**3.** *һөйл.* Шул ысул менән тапшырылған тауышты ҡабул итеү ҡорамалы; трансляция селтәре. *Радионы ҡуйыу.* ■ *Радио Совинформбюро хәбәрҙәренең ҡайғылыһын да, ҡыуаныслыһын да күп килтерҙе. Ә бөгөн унда ял концерты яңғырай.* Ғ. Ибраһимов. *Радио беҙҙең бүлмәлә ҡысҡырып һөйләп тора, йә Мәскәүҙән, йә Өфөнән музыка гөрләп тора.* Р. Ниғмәти.

**4.** *һөйл.* Шул тулҡындар ярҙамында тапшырылған нәмә (төрлө сигнал, хәбәр, музыка һ. б.). *Радио тыңлау.* ■ *Мәскәүҙән диктор фронт хәбәрҙәрен тапшыра. Урам буйлап үтеп барыусылар ҙа, бер аҙ туҡталып, радиоға ҡолаҡ һалып үтәләр.* М. Тажи.

♦ **Радио алғыс** 1) радио тулҡындарын тота, уларҙы тауышҡа, хәбәргә, һүрәткә үҙгәртеп тапшыра торған ҡоролма; 2) радио тапшырыуҙарын ҡабул итә торған аппарат. *Лампалы радио алғыс.* ■ *Шәп әләкте был радио алғыс, бик йәтеш булды. Үҙе детекторлы ғына булһа ла Өфөнө лә, Мәскәүҙе лә бик тиҙ тотоп ала.* К. Мәргән. **Радио бәйләнеше** тауышты алыҫ араға сымһыҙ тапшырыуҙы һәм ҡабул итеүҙе ғәмәлләштергән элемтә. **Радио тапшырғыс** тауышты электромагнит тулҡындарына әйләндереп тарата торған аппарат. *Фашист лазутчигы .. кеҫәһенән бәләкәй генә радио тапшырғыс табылды.* Я. Вәлиев. **Радио тулҡыны** *физ.* алыҫ араға һауа аша сигналдар биреү өсөн ҡулланылған электромагнит тулҡыны.

**РАДИОАКТИВ** [*рус.* радиоактивный] *с.* Радиоактивлыҡҡа мөнәсәбәтле. *Радиоактив нур. Радиоактив таркалыш.* / Радиоактивлыҡ сифатына эйә булған. *Радиоактив ҡалдыҡтар. Радиоактив матдә.*

**РАДИОАКТИВЛЫҠ** *и.* Химик элементтағы атом ядроһының радиация менән бергә барған тарҡалышы. *Тәбиғи радиоактивлыҡ. Яһалма радиоактивлыҡ. Уран радиоактивлығы.*

**РАДИОАППАРАТУ́РА** [*рус.*] *и.* Радио тулҡындарын тапшыра, бер хәлдән икенсе хәлгә үҙгәртә һәм ҡабул итә торған аппараттар системаһы.

**РАДИОАСТРОНО́МИЯ** [*рус.*] *и.* Астрономияның күк есемдәрен үҙҙәре таратҡан радио тулҡындары нигеҙендә өйрәнә торған бүлеге.

**РАДИОБИОЛО́ГИЯ** [*рус.*] *и.* Радиоактив нурҙарҙың организмға булған тәьҫирен өйрәнә торған фән. *Космос радиобиологияһы. Радиобиология институты. Радиобиология лабораторияһы.*

**РАДИОГРА́ММА** [*рус.* ⟨ *лат.* + *гр.*] *и.* Радиотелеграф аша тапшырылған хәбәр. *Радиограмма алыу.* ■ *Үҙәк штабҡа, алдан ҡушылғанса, код менән беренсе радиограмманы ебәрҙек.* Д. Исламов.

**РАДИОГРАФИК** *с.* Радиографияға мөнәсәбәтле, радиографияға нигеҙләнгән. *Радиографик тикшеренеүҙәр.*

**РАДИОГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.* + *гр.*] *и.* Радиацияны, радиоактив элементтарҙы табыу өсөн ҡулланылған фотографик ысул.

**РАДИОЖУРНА́Л** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Журнал материалын хәтерләткән радио тапшырыуы. *«Волга менән Урал араһында» радиожурналы. Тематик радиожурнал.*

**РАДИОЗО́НД** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Һауа шары менән күтәртелеп, төрлө бейеклектәге баҫым температура һәм дымлылыҡты үлсәй, һөҙөмтәһен автоматик рәүештә радио аша ергә тапшыра торған метеорологик прибор. *Аэростатлы радиозонд. Атмосфераны радиозонд ярҙамында тикшереү.*

**РАДИОКОМБА́ЙН** [*рус.*] *и.* Телевизоры, радио алғысы, магнитофоны һәм уйнатҡысы бергә булған аппарат.

**РАДИОКОММЕНТА́ТОР** [*рус.*] *и.* Тышҡы политика, спорт, экономика, сәнғәт һ. б. мәсьәләләр буйынса күҙәтеүҙәр менән сығыш яһаған, шулай уҡ радионан репортаж алып барған кеше.

**РАДИО́ЛА** [*рус.*] Радио алғысы һәм уйнатҡысы булған аппарат. ■ *Күршем пианиноһын онотоп торған сакта өйҙә емерерҙәй итеп радиолаһын ҡыҫҡыртырға тотона.* Р. Солтангәрәев. *Ринат, тумбочка өҫтөндәге радиоланы асып, пластинка ҡуйып ебәрҙе.* М. Садыҡова.

**РАДИОЛАШТЫРЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **радиолаштырыу.** *Радиолаштырылған ауыл. Радиолаштырылған завод.*

**РАДИОЛАШТЫРЫУ** *к.* Радио селтәре менән тәьмин итеү; радио үткәреү. *Илде радиолаштырыу. Ауылды радиолаштырыу. Мәктәпте радиолаштырыу.* ■ *Майҙанды радиолаштырғандар. Кемдер скрипкала һуҙып «Ашҡаҙар» көйөн уйнап ебәрә.* К. Мәргән.

**РАДИО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Радиология буйынса белгес.

**РАДИОЛОГИК** *с.* Радиологияға мөнәсәбәтле. *Радиологик тикшеренеүҙәр. Радиологик приборҙар.*

**РАДИОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.* + *гр.*] *и.* Медицинаның диагноз ҡуйыу йәки дауалау маҡсатында радиация һәм радиоактив дарыуҙарҙың биологик тәьҫирен өйрәнә торған бүлеге. *Медицина радиологияһы институты.*

**РАДИОЛОКА́ТОР** [*рус.*] *и.* Радиолокация өсөн хеҙмәт иткән ҡоролма; радар. *Ер өҫтө радиолокаторы. Эҙәрләүсе радиолокатор. Әйләнмәле радиолокатор.* ■ *Радиолокатор .. радио тулҡындары ярҙамында бер нисә йөҙ километр алыҫлыкта осҡан самолёттың урынын, бейеклеген, хатта ниндәй тиҙлек менән осҡанын билдәләй.* Ф. Мәҡсүтов.

**РАДИОЛОКА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Радио тулҡындарының сағылыш характерынан йәки үҙенең нурланышынан алыҫтағы күҙгә күренмәгән нәмәне табып, ни икәнен белеү, урынын билдәләү ысулы һәм фән менән техниканың шул ысулды өйрәнә торған бүлеге. *Радиолокация антеннаһы. Радиолокация станцияһы.*

**РАДИОМАЯ́К** [*рус.*] *и.* Самолёт һәм караптарға үҙ урынын билдәләргә ярҙам итеү өсөн сигнал биреп торған ҡоро ер радиостанцияһы. *Навигация радиомаяғы. Йүнәлеш радиомаяғы.*

**РАДИО́МЕТР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Электромагнит нурланышы ҡеүәтен бүленгән йылыға ҡарап үлсәй торған прибор.

**2.** Радиоактив матдәләрҙе үҙенән сығҡан радиацияға ҡарап эҙләй торған прибор.

**3.** Радиоактив матдәләрҙең активлығын үлсәй торған прибор.

**4.** Таралған тауыштың баҫымын үлсәй торған прнбор.

**РАДИОМЕТРИК** *с.* **1.** Радиометрия ысулын файҙаланған. *Радиометрик разведка.* ■ *Радиометрик карта буйынса айырым осраҡта ер астындағы нефтле структураларҙы билдәләп була.* Д. Бураҡаев.

**2.** Радиометрия ысулына, уның мәғлүмәттәренә нигеҙләнгән. *Радиометрик анализ.*

**РАДИОМЕ́ТРИЯ** *и.* Физиканың радиоактив матдәләрҙе үлсәү ысулын өйрәнгән бүлеге.

**РАДИОНАВИГА́ЦИЯ** *и.* Радиотехник приборҙар системаһының караблдәрҙе, самолеттарҙы һ. б. бирелгән йүнәлеш буйынса йөрөтөү өсөн ҡулланылыуы. *Радионавигация аппаратуралары заводы. Радионавигация ҡоролмаһы. Радионавигация системаһы.*

**РАДИОПЕРЕДА́ТЧИК** [*рус.*] *и. шул уҡ* **радио тапшырғыс** (*ҡар.* **радио**).

**РАДИОПРИЁМНИК** [*рус.*] *и. шул уҡ* **радио алғыс** (*ҡар.* **радио**). *Детекторлы радиоприёмник. Радиолокация радиоприёмнигы.*

**РАДИОРЕПОРТА́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ваҡиға барған урындан (стадиондан, эш урынынан һ. б.) башҡарылған радио тапшырыуы. *Футбол матчынан радиорепортаж.*

**РАДИОРУ́БКА** [*рус.*] *и.* Караптың радио элемтәһе өсөн тәғәйенләнгән махсус бүлмәһе.

**РАДИОСИГНА́Л** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Радио аша тапшырылған сигнал.

**РАДИОСТА́НЦИЯ** [*рус.*] *и.* Радио тулҡындары ярҙамында төрлө тауыш, хәбәр тапшырыу һәм ҡабул итеү өсөн тәғәйенләнгән техник ҡорамалдар йыйылмаһы. *Ҡабул итеү һәм тапшырыу радиостанцияһы.*

**РАДИОСТУ́ДИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Радио тапшырыуҙары башҡарыла торған махсус бүлмә. *Радиостудияға инеү. Радиостудиянан һөйләү.*

**2.** Радио тапшырыуҙары алып барған ойошма. *Район радиостудияһы.*

**РАДИОТЕЛЕГРА́Ф** [*рус.*] *и.* **1.** Радио аша телеграф элемтәһе алып барған тапшырыусы һәм ҡабул итеүсе аппараттар йәки аппараттар системаһы. *Радиотелеграф элемтәһе.*

**2.** Шул элемтәне тәьмин иткән ойошма, станция.

**РАДИОТЕЛЕМЕТРИК** *с.* Радиотелеметрияға нигеҙле. *Радиотелеметрик мәғлүмәт.* ■ *Спутникта фәнни аппаратураның эше тураһында Ергә мәғлүмәттәр тапшырыу өсөн радиотелеметрик система бар.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 30 октябрь.

**РАДИОТЕЛЕМЕТРИ́Я** [*рус.*] *и.* Төрлө дәүмәлде алыҫ аранан үлсәп, һөҙөмтәһен радио аша тапшырыу ысулы.

**РАДИОТЕЛЕМЕХА́НИКА** [*рус.*] *и.* Телемеханиканың идара итеү һәм контроль информацияларҙы тапшырыу өсөн радио элемтәһен ҡулланған тармағы.

**РАДИОТЕЛЕСКО́П** [*рус.*] *и.* Күк есемдәре тараҡҡан тәбиғи радио нурланышты тотор һәм теркәр өсөн хеҙмәт иткән ҡорамал. *Параболик радиотелескоп.*

**РАДИОТЕЛЕФО́Н** [*рус.*] *и.* Радио аша телефон элемтәһе тотоу өсөн тәғәйенләнгән аппараттар системаһы.

**РАДИОТЕРАПИ́Я** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Радий һәм башҡа радиоактив матдәләрҙең ионлашҡан нурҙары менән дауалау ысулы. *Нур радиотерапияһы.*

**РАДИОТЕ́ХНИК** [*рус.*] *и.* **1.** Радиотехника буйынса белгес.

**2.** Радио аппараттарын ҡуйыу, йүнәтеү менән шөғөлләнгән техник. *Мәктәп радиотехниктар түңәрәге.*

**РАДИОТЕХНИ́К** *с.* Радиотехникаға мөнәсәбәтле. *Радиотехник белем. Радиотехник ҡоролма. Радиотехник разведка. Радиотехник сигнал. Радиотехник система.*

**РАДИОТЕ́ХНИКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Юғары йышлыҡтағы электромагнит тирбәлеше һәм уны элемтәлә, төрлө тапшырыуҙарҙа, навигацияла, астрономияла һ. б. практик ҡулланыу ысулдары тураһындағы фән.

**2.** Техниканың радиоаппаратураны сығарыуға әҙерләү, яһау һәм ҡулланыу эшен башҡарған тармағы.

**РАДИОТРАНСЛЯЦИОН** [*рус.* радиотрансляционный] *с.* Радиотрансляцияға мөнәсәбәтле. *Радиотрансляцион элемтә. Радиотрансляцион ҡоролма.*

**РАДИОТРАНСЛЯ́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Радио программаһының сым аша тапшырылыуы. *Бер программалы радиотрансляция. Драма театрынан радиотрансляция. Радиотрансляция селтәре. Радиотрансляция узелы.*

**РАДИОУ́ЗЕЛ** [*рус.*] *и.* Радио элемтәһен башҡарыу һәм сым аша радио программаһын тапшырыу өсөн махсус рәүештә йыһазландырылған урын. *Трансляцион радиоузел.* ■ *Колхоз радиоузелынан фәнни-атеистик һәм мораль-этик темаларға лекциялар уҡыла.* Ҡ. Аралбаев.

**РАДИОФИ́ЗИКА** [*рус.*] *и.* Физиканың радиотехника һәм электрониканың физик нигеҙҙәрен өйрәнә торған бүлеге. *Радиофизика методтары.*

**РАДИОХИ́МИЯ** [*рус.*] *и.* Химияның радиоактив элементтарҙың үҙенсәлеген, төрлө фән һәм техника өлкәһендәге ҡулланылышын өйрәнә торған бүлеге.

**РАДИОҺӘҮӘҪКӘР** *и.* Радиотехника менән һәүәҫкәр булараҡ шөғөлләнгән (радио алғыстар, телевизорҙар төҙөгән һәм йыйған, радио элемтәһе буйынса тәжрибәләр үткәргән) кеше.

**РАДИОЭЛЕКТРО́НИКА** [*рус.*] *и.* Физика менән техниканың радио элемтәһенә бәйләнгән ҡайһы бер тармаҡтарының дөйөм атамаһы.

**РАДИОЭЛЕМТӘ** *и.* Радио тулҡындары ярҙамында булдырылған бәйләнеш. *Алыҫ-ара радиоэлемтә. Космос радиоэлемтәһе. Радиоэлемтә тотоу.*

**РАДИ́СТ** [*рус.*] *и.* Радио аша хәбәр тапшырыусы һәм ҡабул итеүсе белгес. *Радист ҡатын.* ■ *Радистар курсына эләктем. Мәскәү эргәһендә уҡыным. Өс ай тигәндә яҡшы радист булып өлгөрҙөм.* Д. Исламов.

**РА́ДИУС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *мат.* Түңәрәк йәки шар әйләнәһенең бер нөктәһен үҙәге менән тоташтырған һыҙыҡ һәм шул һыҙыҡтың оҙонлоғо. *Мөйөшлө радиус. Тура радиус. Түңәрәктең радиусы. Ерҙең радиусы.*

**2.** *күсм.* Ниҙеңдер таралыу, хәрәкәт итеү өлкәһе (ниндәйҙер үҙәккә ҡарата). *Пулемёт расчётының хәрәкәт итеү радиусы.*

**РАДО́Н** [*рус.*] *и.* Радиоактив химик элемент, газ (радийҙың ғәҙәттәге шарттарҙа тарҡалыуынан барлыҡҡа килә). *Радон тарҡалышы.* **Радон ваннаһы** радон ҡулланыу менән бәйләнгән ванна. **Радон һыуы** составында радон булған һыу.

**РАЗВЕ́ДКА** [*рус.*] *и.* **1.** Тикшереп, ҡарап, ниҙеңдер барлығын, юҡлығын асыҡлау эше. *Геологик разведка. Разведка быраулауы. Разведка яһау.* ■ *Был разведка скважинаһы. Уны өс мең егерме метр тәрәнлеккә бырауларға кәрәк.* Ғ. Ибраһимов. *Разведка өҫтән-өҫтән генә үткәрелде. Шулай ҙа старателдәр был юлы яңылышманы.* Я. Хамматов. / Дошман тураһында хәрби мәғлүмәт йыйыу өсөн алып барылған эш. *Артиллерия разведкаһы. Оператив разведка. Разведка авиацияһы. Стратегик разведка. Һауа разведкаһы.* ■ *Төндә Шәһит Хоҙайбирҙин ун кеше менән разведкаға китә. Тубыкланып, шыуышып барып, улар дошман позицияһына яҡынлаша.* Ғ. Шафиҡов.

**2.** Дошман тураһында хәрби мәғлүмәт йыйыу эшен башҡарған ғәскәри төркөм. *Разведка насар эшләй. Һуҡырбыҙ. Килә яткан ғәскәрҙең дошманмы, беҙҙекеләрме икәнен белә алмай аптырап ҡалабыҙ.* С. Әлибаев.

**3.** Башҡа дәүләттәрҙең экономик, политик хәле, хәрби ҡеүәте тураһында мәғлүмәт йыйыу менән шөғөлләнгән ойошма. *Сит ил разведкаһы.*

**РАЗВЕДКАЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **разведкалау.**

**РАЗВЕДКАЛАУ** *ҡ.* Разведка (1 мәғ.) алып барыу, разведка яһау. *Газ ятҡылыҡтарын разведкалау.*

**РАЗВЕ́ДЧИК** [*рус.*] *и.* **1.** Ҡаҙылма байлыҡтар эҙләү менән шөғөлләнгән белгес. *Мин ер тикшереүсе разведчик булам. Ҡайҙа нефть, ҡайҙа алтын, кайҙа баҡыр бар — шуларҙы тикшерәм.* Ғ. Ғүмәр. *Хәҙер инде ун йыл буйы нефть эҙләй тыуған ҡырында. Ул [Аҡназар] разведчик — яҙын бында, көҙөн була яңы урында.* Ә. Вәли.

**2.** Разведкаға (2 мәғ.) ебәрелгән, разведкала ҡатнашҡан хәрби хеҙмәткәр. *Разведчик ҡатын.* ■ *Тора-бара Гәүһәр ҡыйыу разведчик булып китте. Аҡтарҙың ҡайҙа нимәләре барын ҡалала йәшеренеп ҡалған ағайҙарға еткереп торҙо.* И. Ғиззәтуллин. *Разведчиктар .. миналы зона барлығы тураһында хәбәр алып килгәйне.* «Ағиҙел», 1967, № 7.

**3.** Сит ил разведкаһы агенты.

**4.** Разведка алып барған самолёт йәки карап.

**РАЗВЁРСТКА** [*рус.*] *и.* Кемдең, нимәнеңдер план буйынса бүленеше. *Йәш белгестәрҙе развёрстка менән эшкә ебәреү. Уҡырға развёрстка менән ебәреү.* ■ *Эшселәрҙе 1 баҫҡыс мәктәптәргә имтиханһыҙ алып, башҡа группаларҙы развёрстка менән генә алырға.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929. / Ошондай бүленеш менән билдәләнгән бойороҡ. *Разверстка тәртибендә тәьмин итеү.* / (*йәки* **аҙыҡ развёрсткаһы**) 1919—1921 йылдарҙа Совет дәүләтендә крәҫтиәндәрҙе ҡаты хаҡ менән артыҡ игенен һатырға мәжбүр иткән ауыл хужалығы аҙыҡтарын әҙерләү системаһы. *Совет власы иген развёрсткаһын натураль налог менән алмаштырырға уйлай.* Я. Вәлиев.

**РАЗВО́Д**[1] [*рус.*] *и. хәрби* Ҡарауыл хеҙмәтенә әҙерләнгән ғәскәри төркөмдө тикшереп, иҫке ҡарауылды алмаштырырға хоҡуҡ биреү өсөн үткәрелгән смотр. *Ҡарауыл разводы.*

■ *Ун берҙә полк канцелярияһы эргәһендә разводта булырға кәрәк. Унда дежур офицер карауылдарҙың ҡайныһын ҡайҙа бүлгеләп ебәрә.* А. Таһиров.

**РАЗВО́Д**[2] [*рус.*] *и.* Ике яҡҡа айырылған бысҡы тештәренең буй аралығы. *Развод һалыу. Бысҡының разводы бөткән.*

**РАЗВО́ДКА** [*рус.*] *и.* Бысҡының тештәрен айыра торған ҡорал.

**РАЗВОДЛАУ** *к.* Развод [2] яһау. *Бысҡыны разводлау.*

**РАЗВОДЯ́ЩИЙ** [*рус.*] *и.* Часовойҙарҙы посҡа ҡуя, алмаштыра торған хәрби хеҙмәткәр.

**РАЗИ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Риза. *Рази булыу.*

**РАЗМЕ́Р** [*рус.*] *и. ҡар.* үлсәм 2. *Егерме бишенсе размер ойоҡ.*

**РАЗНОЧИН** [*рус.* разночинец] *и.* 18—19 быуатта Россияла сығышы менән дворян булмаған, сауҙагәр, мещан, крәҫтиән һ. б. ҡатламдарҙан сыҡҡан интеллигент. *Разночин яҙыусы.*

**РАЗРЕ́З** [*рус.*] *и. тау.* Асыҡ ысул менән файҙалы ҡаҙылдыҡ сығарған урын һәм шул эш менән шөғөлләнгән предприятие. *Күмер разрезы.* ■ *Халыҡ алтын эҙләүҙән туҡталмаһы .. эҙләнә торғас, яңы разрезда алтын юлына төштөләр.* Я. Хамматов.

**РАЗРЯ́Д**[1] [*рус.*] *и.* Ниндәйҙер эш, спорт өлкәһендәге оҫталыҡ дәрәжәһе. *Беренсе разряд. Юғары разряд. Разряд значогы. Разрядҡа имтихан тапшырыу.* ■ *Быйыл ғына һигеҙ кешегә беренсе, ике йөҙ ун алты кешегә икенсе спорт разряды бирелгән.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 24 декабрь.

**РАЗРЯ́Д**[2] [*рус.*] *и. физ.* Есемдең электр зарядын юғалтҡанда күҙәтелгән күренеш.

**РАЗРЯ́ДКА** [*рус.*] *и. типогр.* Яҙылған йәки баҫылған һүҙҙәге хәрефтәрҙе айырған киң аралыҡ. *Разрядка менән баҫыу.*

**РАЗРЯДЛЫ** *с.* Оҫталыҡ дәрәжәһе, разряды булған. *Разрядлы шофёр. Беренсе разрядлы спортсмен.* ■ *Бишенсе разрядлы слесарь башың менән кил дә бында разрядһыҙ-ниһеҙ эшлә, имеш.* Ә. Вәли.

**РАЗРЯДСЫ** *и.* Оҫталыҡ дәрәжәһе, разряды [1] булған спортсмен. *Спортсмендар араһында хәҙер разрядсылар һаны күбәйҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 24 декабрь.

**РАЗЪЕ́ЗД** [*рус.*] *и.* **1.** *т. юл.* Бер яҡлы тимер юлда ҡаршы килгән поездарҙы үткәреү өсөн эшләнгән юл айырсаһы һәм шундағы туҡтау урыны. *Разъездар юлсылар өсөн бәлә бит ул. Ҡайһы ваҡыт унда поезд туҡтамай, туҡтаһа ла, билет һатмай аптыраталар.* Д. Юлтый.

**2.** *хәрби* Разведкаға йәки һаҡҡа ебәрелгән атлы ғәскәр төркөмө. *Ун бишләп һыбайлы килә. Был, һис шикһеҙ, разведка, беҙҙең ут нөктәләрен билдәләү өсөн ебәрелгән разъезд ине.* Ф. Иҫәнғолов.

**РАИХӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тәмле еҫ. *Хуш раихә.*

**РАЙ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Уй, фекер; ҡараш. *Рай тотоу.* ■ *Батша ҡаҙаҡ иленә, башҡорт сиктәренә ғәскәр килтереп туплай. Быны күргәс, Абулхайыр хан үҙ райынан ҡайта* (Хикәйәттән).

**РАЙЗО́** [*рус.*] *и. тар.* Район ер бүлеге. *Колхоз председателе, райзоға һуғылып запчасть алып ҡайтырһың, тигәйне.* М. Тажи.

**РАЙИ́ӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Дәүләт гражданлығындағы мосолман булмаған кеше.

**РАЙКО́М** [*рус.*] *и.* Район комитеты. *Профсоюздар райкомы. Райком секретары.*

**РАЙО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Географик, экономик һ. б. билдәләре менән айырылып торған урын. *Ауыл хужалығы районы. Илдең көнсығыш райондары. Мәңге туң район. Промышленность районы.* / Ауылдың, ҡаланың ниндәйҙер яғы менән айырылып торған бер өлөшө. *Үҙәк район. Эшселәр районы.*

**2.** СССР-ҙа: өлкә, край, союз һәм автономиялы республикаларҙың билдәле бер өлөшөн тәшкил иткән административ-территориаль берәмек. *Колхозсыларҙың район кәңәшмәһе. Район башҡарма комитеты. Район газетаһы. Район етәкселәре. Район ойошмалары. Район үҙәге.* ■ *1930 йылдың август айында кантондар, волостар бөтөрөлдө һәм Башҡорт АССР-ы дөйөм союз өлгөһөндә административ райондарға бүленде.* Б. Юлдашбаев. / *һөйл.* Шул берәмектең административ үҙәгенә ҡарата әйтелә. *Районға барып ҡайтыу. Районда тороу.* ■ *[Гөлнур — Сәғиҙәгә:] Үҙеңде райондан артыҡ алыҫ булмаған бер ҙур ғына ауылға билдәләп тә ҡуйғанмын.* М. Тажи. *Зәйнәп яңғыҙ хәҙер. Ул да инде районғамы, ҡайҙа күсенгән.* Ғ. Сәләм.

**3.** Эре ҡалалағы административ-территориаль берәмек. *Өфө ҡалаһының Ленин районы.*

**РАЙО́Н-АРА** *с.* **1.** Бер нисә районға уртаҡ булған. *Район-ара сауҙа базаһы.* ■ *Мәсәғүт ауылында колхоз идараһы, май заводы, юл төҙәтеү менән шөғөлләнгән район-ара контора һәм педагогия училищеһы бар.* М. Хисмәтов.

**2.** Бер нисә район ҡатнашлығында үткәрелгән. *Район-ара конференция. Район-ара ярыштар.*

**РАЙОНЛАШТЫРЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* районлаштырыу. *Районлаштырылған сорт.*

**РАЙОНЛАШТЫРЫУ** *к.* **1.** Билдәле бер территорияны райондарға бүлеү. *(1930 йылда) Бөтә Союз күләмендә районлаштырыу үткәрелде һәм Башҡортостандың кантондарға бүленеше бөтөрөлдө.* Р. Ҡузыев.

**2.** Билдәле бер район шарттарына ҡулайлаштырыу. *[Бригадир] сәсеү орлоғон районлаштырыу буйынса хәстәрлек күрә башланы.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 6 ғинуар.

**РАЙОНЛАШЫУ** *к.* Теге йәки был район шарттарына ҡулайлашыу. *Питомниктарҙа сейәне орлоғонан үҫтереп, үҫентеләргә районлашҡан яҡшы сортлы сейә күҙәнәктәрен ашлайҙар.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 26 март.

**РАЙОНО́** [*рус.*] *и.* Район халыҡ мәғарифы бүлеге.

**РАЙПОТРЕБСОЮ́З** [*рус.*] *и.* Район потребителдәр союзы һәм шул союздың етәксе органы. *Райпотребсоюз ағзаһы. Райпотребсоюз магазины.*

**РАЙСОБЕ́С** [*рус.*] Район социаль тәьминәт бүлеге. [*Булат:*] *Гөләйшә инәй менән Ғәлиә апай* [*паек алабыҙ тип*] *райсобесҡа барған.* К. Кинйәбулатова.

**РАЙСОВЕ́Т** [*рус.*] *и.* Халыҡ депутаттарының район советы. *Күмертау районсоветы.* ■ *Районсовет ултырышында отчетымды тыңлағас, үҙемде бик маҡтап ташланылар.* М. Тажи.

**РАЙХАН** [*ғәр.*] *и.* **1.** (*йәки* **райхан гөлө**) Быуын-быуын теҙелеп торған зәңгәр суҡ сәскәле, киң оҙонса япраҡлы хуш еҫле үҫемлек.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**РАК** [*рус.*] *и.* Эске йәки тышҡы ағзаларҙың тиресәләрендә барлыҡҡа килә торған яман шеш. *Ашҡаҙан рагы. Бауыр рагы. Тире рагы.*

**РАКЕ́ТА** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* **1.** Эсендәге ҡаты яғыулыҡтың тоҡаныуы менән һауаға атыла торған снаряд (фейерверк осороу һәм хәрби эштә сигнал биреү, ерҙе яҡтыртыу өсөн ҡулланыла). *Ҡыҙыл ракета. Ракета яҡтыһы. Сигнал ракетаһы.* ■ *Бер-бер артлы эҙ ҡалдырып күккә менгән ракеталар дошман позицияларын яҡтырта.* Б. Дим. *Төн. Йылға аръяғынан төрлө яҡлап ракета менән яҡтырталар.* С. Әлибаев.

**2.** Янған яғыулыҡ атылып сыҡҡанда барлыҡҡа килгән реактив көс арҡаһында хәрәкәткә килә торған осоу аппараты. *Космос ракетаһы. Күп быуынлы ракета. Ракета двигателе. Ракета яғыулығы.* ■ *[Кәтүк:] Шундайын шәп заманға килеп еттек, Бағанай ағай .. Совет кешеһенең ҡулы менән яһалған ракета Айҙың аяҙ диңгеҙенә барып төштө.* Н. Хафизов. *Совет кешеһе ебәргән ракета етте Айға.* Ә. Вәли. **Баллистик ракета** билдәле траектория буйлап осҡан ракета. **Йөрөткөс ракета** космосҡа файҙалы йөктәрҙе (Ерҙең яһалма Спутниктарын, планета-ара станцияларҙы һ. б.) күтәреп мендереү өсөн ҡулланылған күп быуынлы ракета. **Орбиталь ракета** билдәле орбитаға сығарылып, пилот менән йәки автоматик рәүештә оса торған ракета (Ерҙең яһалма юлдашынан Ерҙең үҙен һәм тирә-яҡ космос киңлеген тикшерә, метеорологик, астрономик, радиоастрономик һәм башҡа төр күҙәтеүҙәр алып бара, медик-биологик эксперименттар үткәрә, навигация мәсьәләләрен өйрәнә, космос шарттарында материалдарҙың һәм төрлө йыһаздарҙың үҙгәреү-үҙгәрмәүен тикшерә, Ҡояш системаһының башҡа планеталарына осорға тейеш ауыр космос караблдәрен йыйыу өсөн база хеҙмәтен үтәй). **Осорғос ракета** Ерҙең яһалма юлдашын, планета-ара автоматик станцияларҙы, орбиталь станцияларҙы һәм космос карабын йыһанға алып сыға торған күп быуынлы ракета. **Ракета быуыны** күп быуынлы ракетаның, бер-бер артлы бүленеп ҡалып, траекторияның билдәле бер участкаһында актив осошто тәьмин итә торған өлөшө. / *хәрби* Атылған газ ағымының этеү көсө менән хәрәкәткә килтерелгән һуғыш снаряды. *Стратегик ракета. Ракета ғәскәрҙәре. Ракета ҡоралы. Ракета системаһы.* ■ *Тиҙҙән күршеләге тау артынан самолет килеп сыҡты. Түбәндән ракета аттылар.* Ф. Лоҡманов. *Кремль майҙанында булған һәр кем Совет ракета артиллерияһына, данлыҡлы «Катюшаларға» тейешле баһа бирә.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 8 ноябрь. **Ракета йөрөткөс** стратегик йәки оператив-тактик ракета менән ҡоралланған хәрби самолет йәки карап. *Стратегик ракета йөрөткөс. Тактик ракета йөрөткөс. // Ракета йөрөткөс истребитель. Ракета йөрөткөс һыу аҫты кәмәһе.*

**3.** Ҡанаты һыу аҫтында булған тиҙ йөрөшлө бәләкәй пассажир катеры (карабы).

**РАКЕТАСЫ** *и.* **1.** Ракета (1 мәғ.) менән сигнал бирә торған кеше.

**2.** Ракета (2 мәғ.) двигателдәре буйынса белгес.

**3.** Ракета (2 мәғ.) ғәскәрҙәрендә хеҙмәт иткән хәрби хеҙмәткәр. // *Ракетасы һалдат. Ракетасы часть.* ■ *Ракетасылар ракета йөрөткөстөң кабинаһында ултырып бара.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 3 ғинуар. *Һыбайлының улы хеҙмәттә ракетасы данлы частарҙа.* Ғ. Рамазанов.

**РАКЕ́ТКА** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Теннис, бадминтон уйнағанда туп һуға торған оҙонса ағас йәки сетка тартҡан ҡалаҡ.

**РАКЕ́ТНИЦА** [*рус.*] *и.* Сигнал ракеталарын осора торған махсус ҡулайлама. / Яҡтыртҡыс һәм сигнал ракеталарын осора торған пистолет. *Ракетницанан сигнал бирелде, йылға өҫтөндә моторҙар геүләп китте.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 27 июль.

**РАКЕТОДРО́М** [*рус.*] *и.* Ракеталарҙы (2 мәғ.) һынау һәм осороу өсөн махсус эшләнгән урын. *Ана «Марс — 1» ракетаһы рейстан ҡайтты. Бөтә ил, ғәләм батырҙарын ҡотлар өсөн, ракетодромға йыйылған.* Р. Ғабдрахманов.

**РА́КОВИНА** [*рус.*] *и.* Һыу үткәргестең краны аҫтына стенаға беркетеп ҡуйылған тишекле һауыт. *Йыуыныу раковинаһы.*

**РАМ** [*рус.* рама] *и.* **1.** Эсенә һүрәт йәки башҡа нәмә ҡуйыу өсөн эшләнгән дүрткел, оҙонса һ. б. формалағы тирәс. *Көҙгө рамы.* ■ *Быялалы рам эсендә бик иҫке фотолар эленеп тора ине.* З. Биишева. *Яҙғы ҡояштай ялтырап сәскәле рам эсендә Ленин бабайым йылмая.* Я. Ҡолмой. / Умарта эсенә балауыҙ беркетеп ҡуя торған ағас тирәс. *Айыу умартаны йылға эсенә алып барып ауҙарҙы, рамдарын тартып сығарып, бал ашарға кереште.* Н. Мусин.

**2.** (*йәки* **тәҙрә рамы**) Тәҙрәнең быяланы тирәсләп торған өлөшө. *Рам ҡуймай тотош быяланан эшләнгән ҙур тәҙрә түпһаһына менеп баҫтым.* С. Агиш.

**3.** *махс.* Машина, механизм йәки ҡоролманың хәрәкәтһеҙ частарҙы бергә беркетеп, уларға терәк, нигеҙ булған өлөшө. *Автомашина рамы. Вагон рамы. Тимер-бетон рамы.*

**4.** (*йәки* **бысҡы рамы**) *махс.* Таҡта яра торған машинаның бысҡылар беркетелгән өлөшө. *Константин ярҙамы арҡаһында ул [Сурагол] таҡта ярыу заводында рамға ағас биреп тороусынан рамсы булып әүерелде.* Т. Хәйбуллин.

**РАМАҘАН** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ай календарының туғыҙынсы, мосолмандар ураҙа тота торған айы (*ҡар.* **календарь**). *«Рамаҙан айында ҡалдырған бер көн ураҙа өсөн башҡа айҙарҙа 40 көн ураҙа тоторға кәрәк»,— тине мулла.* Ф. Рәхимғолова. **Рамаҙан шәриф** данлыҡлы рамаҙан (ай тураһында). *Беҙ һуғышҡа сығып киттек рамаҙан шәриф айында* (Бәйеттән).

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**РА́МКА** [*рус.*] *и.* **1.** Шартлы рәүештә индерелгән йәки дөйөм ҡабул ителгән сикле хәл; сик.

*Ғәскәри устав рамкаһында. Капиталистик йәмғиәт рамкаһында. Кешелек рамкаһына һыймаған тормош. Совет закондары рамкаһында.* ■ *Уҡытыусыға үҙ һөнәренең тар рамкаһында бикләнеп ҡалмай, һәр яҡлап үҫкән, белемле һәм культуралы шәхес булырға тейеш.* Ф. Мөхәмәтйәнов.

2. Солғаныш, уратым. *Фонетик рамкала килеү. Әҙәби рамкала бирелеү.* ■ *Салауат етәкселегендәге восстание милли азатлыҡ рамкаһынан сығып, синфи азатлыҡ өсөн көрәш юғарылығына күтәрелгән.* В. Әхмәҙиев.

**РАМЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **рамлау.** *Рамланған тәҙрә. Рамланған һүрәт.*

**РАМЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **рамлау.** *Иштуған Ленин һүрәтен рамлатып, быяла ҡуйҙырып, балаларҙың ҡаршыһына, стенаға элеп ҡуйҙы.* З. Биишева.

**РАМЛАУ** *ҡ.* **1.** Рамға (1 мәғ.) ҡуйыу, рамлы итеү. *Һүрәтте рамлау.*

**2.** Рам (2 мәғ.) яһап ҡуйыу, рамлы итеү. *Тәҙрәне рамлау.*

**РАМЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **рамлау.**

**РАМЛЫ** *с.* **1.** Рамға (1 мәғ.) ҡуйылған. *Рамлы карточка.* / Рам (1 мәғ.) ҡуйылған. *Рамлы умарта.*

**2.** Рам (2 мәғ.) ҡуйып эшләнгән. *Рамлы тәҙрә.*

**РА́МПА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *театр.* Сәхнәне яҡтырта торған уттарҙы авансцена буйлап тамашасыларҙан ҡаплап торған тәпәшәк кенә оҙон барьер. *Зәкиә Арсланова рампа уттары менән яҡтыртылған сәхнәлә кешеләр күңеленә яҡты уттар тоҡандыра.* И. Абдуллин.

**РАМСЫ** *и.* **1.** Рам (1, 2 мәғ.) яһаусы оҫта.

**2.** Таҡта ярыу машинаһында рамда (4 мәғ.) эшләгән эшсе.

**РАНГ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Хеҙмәттәге урынға ҡарап айырыу дәрәжәһе; махсус хәрби йәки дипломатик звание, разряд. *Дипломатик рангтар. Икенсе рангы капитан. Олимпия чемпионы рангыһы.* ■ *Бында, ялан шарттарында, өсөнсө рангы хәрби врач Әхмәт Дәүләтов ауыр яралыларға ҡатмарлы операциялар яһай.* Ә. Ихсан. *Хәрби рангылар бары утыҙынсы йылдарҙың яртыһынан башлап ҡына индерелде.* С. Кулибай.

**2.** Хәрби караптың категорияһы, разряды (СССР-ҙа хәрби караптар 4 рангҡа бүленә: 1-се ранг — линкор, крейсер һәм авианосецтар; 2-се ранг — эсминец менән ҙур һыу аҫты кәмәләре; 3—4-се ранг — башҡа караптар).

**РАНЕ́ТКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ваҡ емешле алма ағасының ҡышҡы сорты һәм шул ағастың емеше. *Ранетка вареньеһы.* ■ *«Маҡан» совхозының алма баҡсаһында ҡуш йөҙөрөк хәтлем антоновканан алып бармаҡ башындай ранеткаға тиклем һәр төрлө алма бар.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 27 сентябрь.

**РА́НЕЦ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Хәрбиҙәр юлға, уҡыусылар мәктәпкә йөрөтә торған артмаҡлы сумка йәки моҡсай. *Мин ҡулбаштарымдан ысҡындырып ранецымды .. һалдым.* В. Нафиҡов. *Беренсе класс уҡыусыһына портфелгә ҡарағанда ранец уңайлыраҡ — уны арҡаға аҫып йөрөү арҡа һөйәген тура тотоуға ярҙам итә.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 21 август.

**РАНЖИ́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*]: **ранжир буйынса** буйға ҡарап (сафҡа теҙелеү). *Ранжир буйынса теҙелгән колоннала иң артта тәбәнәк буйлы һалдаттар бара.* Х. Мохтар.

**РАНТ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Аяҡ кейеменең өҫтөн тыш яҡтан табаны менән бергә тоташтырған тар ғына күн.

**РАНТЛЫ** *с.* Рант ҡуйып тегелгән (аяҡ кейемена ҡарата). *Рантлы ботинка. Рантлы итек.*

**РАНТЬЕ́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Капиталистик йәмғиәттә: ссудаға биргән капиталдың проценты йәки ҡиммәтле ҡағыҙ (акция, облигация) килтергән керем иҫәбенә йәшәгән кеше.

**РА́НЧО** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* **1.** Латин Америкаһы илдәрендә айырым хужалыҡ.

**2.** Америка Ҡушма Штаттарында малсылыҡ фермаһы.

**РАПАТ** *и.* **1.** Ағастың юнғандан, сапҡандан һуң ярылып уңалған урыны, йөйө.

**2.** *ҡусм.* Силсәнән һуң ҡалған йөй.

**РАПИ́РА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Сәнсер өсөн ҡулланылған оҙон һәм һығылмалы дүрт ҡырлы ҡорал (күнегеү маҡсатында һәм спорт фехтованиеһында ғына ҡулланыла).

**РАПИРАСЫ** *и.* Рапирала күнегеүсе йәки ярышыусы спортсмен. *Рапирасы ҡыҙ.* ■ *Россия беренселеге Башҡортостан рапирасылары өсөн СССР беренселегенең һайлап алыу турнирына .. ҙур һынау булды.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 7 июнь.

**РА́ПОРТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Хәрби хеҙмәткәр устав менән билдәләнгән тәртипә юғарыға телдән йәки яҙма рәүештә мөрәжәғәт иткәндә бирелгән рәсми хәбәр. *Рапорт алыу. Рапорт биреү.* ■ *Ҡыҙыл Армия Колчак ғәскәрен Өфөнән ҡыуып сығарғас, Ҡорбанов Чапаевҡа килеп рапорт биргән.* М. Тажи. *Асатай .. шалт баҫып, үксәләрен бергә ҡушып һуҡты ла, честь биреп, рапорт яһаны: — Иптәш командир! Һеҙ ҡушҡан задание тулыһы менән үтәлде.* Һ. Дәүләтшина. / Йөкләмә йәки бурыстың үтәлеүе хаҡында бирелгән хәбәр. *[Дауытов — Байназарға:] Сифат ягы нисек, сифат? Унда һеҙ, тиҙерәк рапорт биреү менән мауығып, баҫыу буйынса сабып ҡына сыҡманығыҙмы?* Б. Бикбай.

**РАПСО́ДИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Халыҡ йырҙары һәм бейеүҙәре темаһына яҙылған инструменталь йәки вокаль-инструменталь әҫәр. *Листың Венгр рапсодияһы.*

**РАРИТЕ́Т** *и. кит.* Һирәк осрай торған ҡиммәтле нәмә. *Раритеттар коллекцияһы. Музей раритеттары.*

**РА́СА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Сығыштары һәм нәҫелдән килгән физик үҙенсәлектәре (тән төҫөлөшө, сәсе һ. б.) уртаҡ булып, тарихи үҫеш һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән халыҡтар төркөмө. *Европеоид (аҡ) раса. Негроид (ҡара) раса. Монголоид (һары) раса. Раса дискриминацияһы. Раса теорияһы.* ■ *Башҡорт АССР-ының төрлө расанан һәм милләттән булған граждандары тиң хоҡуҡлы.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**РАСИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Кешелек донъяһын сығышынан уҡ юғары һәм түбән расаларға бүленгән тип, шуларҙың юғарылары ғына цивилизацияны

барлыҡҡа килтергән һәм хакимлыҡ итергә хаҡлы, ә түбәндәре рухи яҡтан кәм һәм иҙелергә генә һәләтле тип иҫәпләгән ялған, кешегә дошман концепциялар йыйымы.

**РАСИ́СТ** [*рус.*] *и.* Расизм яҡлы кеше. *Америка расистары. Африка расистары.*

**РАСИСТИК** *с.* Расизм һәм расист мөнәсәбәтле. *Расистик закондар. Расистик режим. Фашизмдың расистик теорияһы.*

**РАСКЛАДУ́ШКА** *и.* Йыйылмалы карауат. *Юлсылар арығайны, шуға күрә ҡайныһы иҙәнгә йығылды, ҡайныһы раскладушка ҡороп ятты.* Ш. Янбаев.

**РАСКУЛА́ЧИТЬ** [*рус.*]: **раскулачить итеү** *тар.* кулактарҙы синыф булараҡ юҡ иткәндә етештереү ҡоралдарынан, еренән мәхрүм итеү. [*Тимер — Гәрәйгә:*] *Ярлылар йыйылышы ҡарарын еренә еткерергә кәрәк: һине раскулачить итәбеҙ.* Б. Бикбай.

**РАСПИСА́НИЕ** [*рус.*] *и.* Эштең ваҡытын, урынын һәм бер-бер артлы үтәлеш тәртибен күрһәткән график. *Поезд расписаниеһы. Расписание төҙөү.* ■ *Ҡағыҙҙы өҫтәл өҫтөнә йәйеп һалған да, Салих уҡыу йылының беренсе сирегенә дәрес расписаниеһы төҙөй.* С. Агиш.

**РАСПИ́СКА** [*рус.*] *и.* Ниҙер алғанлыҡты дөрөҫләп ҡул ҡуйған документ. *Расписка алыу. Расписка биреү.*

**РАССА́ДА** [*рус.*] *и.* Күсереп ултыртыу өсөн парникта йәки өйҙә үҫтерелгән йәшелсә. *Кәбеҫтә рассадаһы. Рассада ултыртыу.*

**РАССАДАЛЫҠ** *и.* **1.** Рассада ултыртылған урын. *Сәскә рассадалығы.*

**2.** Мал, ҡош-ҡорт үрсетә торған урын. *Тоҡом малы рассадалығы.* ■ *Һыйыр малының яҡшы тоҡом рассадалығы 1925 йылғы өстән 1928 йылға бишкә етте.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**РАССА́ДНИК** [*рус.*] *и.* *ҡар.* **рассадалыҡ.**

**РАССО́ЛЬНИК** [*рус.*] *и.* Тоҙло ҡыяр туралып бешерелгән итле аш йәки балыҡ һурпаһы. *Балыҡ рассольнигы. Итле рассольник.*

**РАСТРА́ТА** [*рус.*] *и.* **1.** Вазифалы кешенең ышанып тапшырылған аҡса йәки башҡа байлыҡты законһыҙ тотоноуы. *Растрата яһау.*

**2.** Законһыҙ туҙҙырылған хөкүмәт аҡсаһы йәки байлыҡ-мөлкәт. *Растрата сыккан. Растратаны ҡаплау.*

**РАСТРА́ТЧИК** [*рус.*] *и.* Растрата (1 мәғ.) яһаған кеше.

**РАСФАСО́ВКА** [*рус.*] *и.* Тауарҙың алдан, һатмаҫ борон билдәле ауырлыҡта, күләмдә бүлгеләп үлсәнеп, һауытҡа һалыныуы. *Расфасовка яһау.* ■ *Расфасовка бүлегендә ҡыҙҙар карбамидты махсус тоҡтарға тултыралар, уларға этикеткалар йәбештерәләр.* Ә. Бикчәнтәев.

**РАСФАСОВКАЛАУ** *ҡ.* Расфасовка яһау. *Ондо расфасовкалау. Шәкәрҙе расфасовкалау.*

**РАСХО́Д** *и.* *ҡар.* **сығым.** *Энергия расходы. Һыу расходы. Расходтар сметаһы.* ■ *Гәрәй Ғамирға Шәрифәне бирҙе. Ҡалым алманы, туй яһаманылар, бер расход сыкманы.* Б. Бикбай.

**РАСХОДЛАНЫУ** *ҡ.* Нимәгәлер аҡса түгеү, тотоноу. *Ашаған хаҡы ла сыкманы. Расходланып ниңә беҙҙе [эшкә] йыйғандар икән?* К. Мәргән.

**РАСХОДЛЫ** *с.* *ҡар.* **сығымлы.** *Расходлы э[...]*

**РАСЧЁТ** *и.* **1.** *ҡар.* **иҫәп** 3. *Дөрөҫ расч[...] Хата расчёт. Расчёт менән йәшәү. Расчёт мен[...] өйләнеү. Расчёт менән эшләү.*

**2.** Эш хаҡының, элек индерелгән аҡсаны ниндәйҙер бурыстың аҡса менән түләнеүе, ҡа[...]ланыуы йәки кире ҡайтарылыуы; иҫәп. *Расч[...] операцияһы. Расчёт алыу. Расчёт биреү.* [...] *[Ғәләү — Шәхмигә:] Миңә расчёт бир. Һинең к[...] бәхәт, ялғансы Ҡәмәреңә ҡол булып тор[...] булмаҫ.* Т. Йәнәби.

**3.** Кемдеңдер башҡарған эше өсөн хаҡын т[...]ләп, ҡаплап йәки кире ҡайтарып эштән буш[...]тылыуы. *[Әмирханов — Салихҡа:] Һинең, м[...]лай, расчёт алғың киләме әллә? Бик телең оҙ[...] башланы.* С. Агиш.

**4.** *хәрби* Орудие, миномёт, пулемёт һ. б. ҡора[...]ды хеҙмәтләндергән ғәскәри төркөм. *Оруд[...] расчёты. Расчёт командиры.* ■ *Расчёт үл[...] бөткән. Хәмит .. снарядтарҙы үҙе алып кил[...] үҙе ҡора, үҙе тоҫҡап ата ине.* Ә. Ихсан. *Лавр[...] пулемётын һөйрәп йүгерҙе һәм туҡталып бер [...] очередь бирҙе .. Башҡа расчёттар ҙа унан өл[...] алды.* Б. Дим.

**РАҪ** [*фарс.*] *с.* Ғәмәлдәгегә тап килешл[...] дөрөҫ, ысын; урынлы, хаҡлы. *Раҫ һүҙ. // Р[...] әйтеү. // Раҫҡа һанау. Раҫты һөйләү.* ■ *Яхъ[...]ның һүҙе раҫ икән шул. Беҙ килгәнсе яр буйын тоҡтарҙы килтереп ташларға өлгөргәйнел[...] инде.* Т. Килмөхәмәтов. *Шоферҙың һүҙе ра[...] булды. Ярты сәғәт тә китмәнек, ямғыр быҫҡа[...] лаҡға тотонды.* Ф. Иҫәнғолов. *«Һантыйҙы би[...] сәсеп үҫтермәйҙәр» — бик раҫ әйтә икән бы[...] мәҡәл.* Х. Кәрим. *Мәсем хан .. Ҡарағөлөмбә[...] эшен раҫҡа һанап, ун ике бей өҫтөнән бе[...] ҡылмаҡ була.* «Күсәкбей». **Раҫ килеү** 1) нимәле[...] көтөлгәнгә тап килеү; үҙәгенә, үҙенә баҫы[...] *Сабый саҡта .. күргән төшөм раҫ килде егерм[...] өс йәшемдә* (Бәйеттән); 2) дөрөҫкә, ысынға сы[...]ғыу, тормошҡа ашыу; ысынбарлыҡта дөрөҫлә[...]неү. *Ефим Наумовичтың әйткән һүҙҙәре ра[...] килде.* Ә. Гәрәев. **Раҫҡа килеү** (*йәки* **сығыу** *ҡар.* **раҫ килеү** 2. [*Мөбәрәк:*] *Улым үҙенең к[...]мандирынан да шәберәк командир буласаҡ. Әгә[...] ҙә мәгәр һүҙем раҫҡа сыҡмаһа, бына ошо кәпә[...] семде кейәсәгем юҡ.* Р. Ғабдрахманов. *Ауы[...] халҡының алдан күрәҙәлек итеүе раҫҡа килмәне* «Әҙәби Башҡортостан», 1960, 8 август.

**РАҪЛАМА** *и.* Ниҙеңдер раҫ, ысын икәне[...] күрһәткән дәлил. *Раҫлама килтереү. Раҫлам[...] табыу. Раҫлама яҙыу.*

**РАҪЛАНЫУ** *ҡ.* *төш.* *ҡар.* **раҫлау.** *Бирелгә[...] баһа раҫланды. Эш планы төҙөлөп раҫланды. Ярыш шарттары раҫланды.* ■ *Район һәм ҡал[...] прокурорҙары РСФСР Прокуроры тарафына[...] раҫлана.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы 1984.

**РАҪЛАТЫУ** *ҡ.* *йөкм.* *ҡар.* **раҫлау.**

**РАҪЛАУ** *ҡ.* **1.** Ғәмәлгә тап килгәнен күрһәтеү дөрөҫкә сығарыу; дөрөҫләү. *Фекерҙе раҫлау Дәлил менән раҫлау. Раҫларлыҡ дәлилдәр табыу.* ■ *Көслө ел, минең һүҙҙәремде раҫлаған[...]дай, беҙҙең йөҙөбөҙгә уҫлап-уҫлап ҡар һирпте*

Ғ. Ғүмәр. *«Буран ана калай ыжғыра!» — тине әбей. Уның һүҙен раҫлағандай көслө елдән өй калтырап куйҙы.* Х. Мохтар. *Карагөлөмбәт, һүҙеңдең дөрөҫлөгөн дәлилең раҫланы тип, Йәмиләне өсөнсө катын итеп ала.* «Күсәкбей». / Ғәмәлгә тап килтереү. *Һүҙҙе эш менән раҫлау.* ■ *Тормошто раҫлау өсөн ул [Урал батыр] үҙе тапкан йәншишмә һыуын ер йөҙөнә һибә.* К. Мәргән.

2. Дөрөҫ тип билдәләү; дөрөҫләү. *Кешенең һүҙен раҫлау.* ■ *— Һин ысынлап та үҙ эшеңдең бөйөк оҫтаһы икәнһең!.. Был көршәк ысын талант емеше,— тип раҫлаған батша өйрәнсектең эшен.* З. Биишева. *Улар бергә тора, тормоштары сыуак көндәр булып йүгерҙе. Уларҙы күрһәгеҙ, шағир түгел, һеҙ ҙә шуны раҫлар инегеҙ.* Ғ. Сәләм. / Ысын тип, ышандырып һөйләү.— *Бураншы менән кәрәк икән, дауылды ла ауыҙлыклап була,— тип кыйыу раҫлай Ирйегет.* З. Биишева. *Беҙ кеүәтле, ләкин кабатлайбыҙ һәм раҫлайбыҙ: «Йәшә, тыныслык!»* Х. Ғиләжев.

3. Ғәмәлгә ярашлы тип, рәсми рәүештә нығытыу. *Ойоштороу мәсьәләләренә кускәс, Тимер Янһаровты ауыл советы председателенең урынбаҫары итеп раҫланылар.* Б. Бикбай.

**РАҪЛАУСЫ** *и.* Рәсми хәлдең ғәмәлдә булғанлығын закон йәки култамға, мисәт менән нығытыусы. *Ике раҫлаусының култамғаһы.*

**РАТИ́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Өҫ кейеме тегеүгә барған уң яғы бөҙрәләнеп торған калын йөн тукыма. *Ратиндан пальто тегеү. // Ратин пальто.*

**РАТИФИКАЦИОН** [*рус.* ратификационный] *с.* Ратификацияға мөнәсәбәтле. *Ратификацион грамота.*

**РАТИФИКА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Дәүләттәр араһында вәкәләттәр төҙөгән договорҙы хөкүмәттең юғары органының култамға менән раҫлауы. *Ратификация хокуғы. Ратификация яһау:*

**РАТИФИКАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **ратификациялау.** *Ратификацияланған договор.*

**РАТИФИКАЦИЯЛАУ** *к.* Ратификация яһау. *Договорҙы ратификациялау.*

**РА́ТУША** [*рус.* ⟨*пол.*] *и.* **1.** 18 быуатта Россияла кала үҙ идара органы.

2. Кайһы бер Европа дәүләттәрендә: кала үҙ идара органы һәм шул идара урынлашкан бина. *Прагала иҫке ратуша стенаһындағы легендар сәғәт ватылған.* Ә. Харисов.

**РАУЗА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Бакса, гөл баксаһы. / Йәннәт баксаһы.

2. (*баш хәреф менән*) Катын-кыҙ исеме.

**РАУИ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Хәбәр һөйләүсе, хәбәр еткереүсе. *Бер хикәйәт кылайым уш мөхтәсәр. Рауиҙарҙан булды беҙгә был хәбәр* (Халык шиғырынан).

**РА́УНД** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и. спорт* Бокс һуғышының бер тынаһы (ғәҙәттә өс минут) һәм шул һуғыштың үҙе. *Беренсе раунд. Һуңғы раунд.*

**РАУШАН** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Якты. *Зиһенемде раушан әйләп, бәхетле кыл, тәғәлә алла* (Мөнәжәттән).

2. (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**РАФИК** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Иптәш, тормош юлдашы.

2. Дуҫ. *Рафик кылышыу.*

3. (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**РАФИНА́Д** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Таҙартып, төрлөсә киҫәккә бүлгеләнгән шәкәр. *Рафинад заводы.*

**РАФИНАДЛАУ** *к.* Эшкәртеп, рафинадка әйләндереү. *Шәкәрҙе рафинадлау.*

**РАХИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Организмда матдәләр алмашыныуы боҙолғандан һәм Д витамины етешмәгәнлектән барлыкка килеп, һөйәк һәм нервы системаһының үҫешен үҙгәрткән имсәк йәшендәге балалар ауырыуы.

**РАХМАН** [*ғәр.*] *с. иҫк.* **1.** Мәрхәмәтле (аллаға карата).

2. (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**РАҺ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Юл. *Табырһың гилем эсендә раһ.* М. Өмөтбаев.

**РАЦИО́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Билдәле вакытка әҙерләнгән аҙык күләме һәм уның төрҙәре. *Аҙык рационы. Поход рационы. Рацион төҙөү.* / Тәүлеккә етерлек төрлө мал аҙығы. *Ашатыу рационы. Һуғым малы рационы. Кышкы рацион.* ■ *Автомат транспортер рационда каралған аҙыкты һыйырҙарға бирә.* И. Ғиззәтуллин. *Әлегә бөтә ерҙә лә рациондар фәнни нигеҙҙә төҙөлмәй, малды ашатканда уның продуктлылығы иҫәпкә алынмай.* «Совет Башкортостаны», 1970, 7 март.

**РАЦИОНАЛИЗА́ТОР** [*рус.*] *и.* Эште, эш процестарын якшыртыу саралары индереү менән шөғөлләнгән кеше; рационализация индергән кеше. *Рационализаторҙар бюроһы.* ■ [*Йомабикә:*] *Йәрмөхәмәт — бынамын тигән тракторист. Ябай тракторист кына ла түгел — механик, ябай механик кына ла түгел — рационализатор!* Ғ. Әхмәтшин.

**РАЦИОНАЛИЗАТОРЛЫК** *и.* Рационализатор эшмәкәрлеге. *Рационализаторлык тәкдиме.* ■ *Конструктор Ғарифьян Мөғәлимов ул сактарҙа рационализаторлык эшен башлап кына тора ине әле. Ә Бөгөн ул заводтың ғына түгел, каланың атаклы рационализаторы.* М. Хәйҙәров. *БАССР граждандарына ғилми техник һәм художестволы ижад ирке гарантиялана. Ул ғилми тикшеренеүҙәрҙе, уйлап табыусылык һәм рационализаторлык эшмәкәрлеген киң йәйелдереү менән тәьмин ителә.* Башкорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**РАЦИОНАЛИЗА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ниндәйҙер эшмәкәрлектең максатка ярашлырак рациональ юл менән ойошторолоуы; камиллаштырыу, якшыртыу. *Рационализация саралары. Рационализация үткәреү.*

**РАЦИОНАЛИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Танып белеү процесенда акыл һәләтен берҙән-бер белем сығанағы тип иҫәпләгән, был процеста тәжрибә менән һиҙемдең әһәмиәтен баһалап еткермәгән йәки бөтөнләй кире каккан философик йүнәлеш. *17 быуат француз рационализмы.*

2. Тормошта, ғәҙәт, холокта акылды тойғонан айырған, өҫтөн куйған караш. *Рационализм менән һуғарыу.*

**РАЦИОНАЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* Рационализм (1 мәғ.) яклы кеше.

**РАЦИОНАЛИСТИК** *с.* **1.** Рационализмға мөнәсәбәтле; рационализмға нигеҙләнгән. *Рационалистик караш. Рационалиссик куренеш.*

**2.** Аҡылға, логикаға нигеҙләнгән. *Рационалистик ҡылыҡ. Рационалистик фекер.*

**РАЦИОНАЛЛӘШТЕРЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **рационаллэштереү.** *Рационалләштерелгән эш процестары.*

**РАЦИОНАЛЛӘШТЕРЕҮ** *к.* Рационализация үткәреү; рационализация, яңы, яҡшы ысул индереү. *Етештереү процесын рационалләштереү. Йөк ташыуҙы рационалләштереү.*

**РАЦИОНАЛЬ** [*рус.* рациональный] *с.* **1.** Рационализмға (1 мәғ.) нигеҙләнгән. *Рациональ идея. Рациональ философия.*

**2.** Аҡылға, логикаға нигеҙләнгән; аҡыллы. *Рациональ тәҡдим. // Ерҙе рациональ файҙаланыу. Ремонтты рациональ ойоштороу.* / Маҡсатҡа ярашлы, дөрөҫ ойошторолған. *Рациональ хужалыҡ. // Дәресте рациональ үткәреү.* ■ *Һәр бер ҡала билдәле кимәлгә тиклем генә экономик яҡтан рациональ үҫешә ала.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 6 ғинуар.

**3.** *мат.* Айырым бермәмек йәки уның өлөшө менән үҙ-ара сағыштырырлыҡ. *Рациональ һандар.* / Тамыр табыу билдәһе, радикалы булмаған (алгебраик аңлатма тураһында). *Рациональ аңлатмалар.*

**РА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Күсереп йөрөтмәле ҡабул итә һәм тапшыра торған радиостанция. *Эфирҙа ниндәйҙер билдәһеҙ рация эшләй башланы.* Ф. Лоҡманов. *Походта барғанда, ял итергә туҡтағанда полк рацияларын ҡороп, донъя хәлдәрен тыңлайбыҙ.* «Ағиҙел», 1970, № 5.

**РАШҠЫ** *и.* Ямғыр ҡатыш яуған боҙло епшек ҡар. *Рашҡы яуыу.* ■ *Ҡара һыуыҡ елле, рашҡы ҡатыш ямғырлы көндәр башланды.* М. Ғәжи.

**РАШҠЫЛАУ** *к.* Көн боҙолоп, рашҡылар башланыу. *Рашҡылап китеү.* ■ *Апрель урталарында булды был хәл — рашҡылап ҡар ҡатыш ямғыр яуа, йырынтылар яһап ҡар һыуҙары аға ине.* М. Хәйҙәров.

**РА́ШПИЛЬ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Эре тешле игәү. *Йөҙө эре рашпиль.*

**РЕАБИЛИТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Нахаҡ ғәйепләнгән йәки рәнйетелгән кешенең рәсми рәүештә аҡланышы. *Реабилитация алыу. Реабилитацияға эләгеү. Реабилитация яһау.* ■ *Янды егет. Партиянан сығарып ун йылға хөкөм иттеләр. .. Аҙаҡ ул егет .. реабилитацияға эләгеп ҡайтҡан, тинеләр.* Ә. Хәкимов.

**2.** Суд йәки административ юл менән кешенең элекке хоҡуғына кире ҡайтарылыуы. *Реабилитация талап итеү. Реабилитация юллау.*

**3.** *мед.* Ауырып йәки имгәнеп физик һәм психик һәләт кәмегәндән һуң һаулыҡтың, эшкә яраҡлыҡтың элекке хәлгә ҡайтыуы. *Көнкүреш реабилитацияһы. Профессиональ реабилитация. Реабилитация бүлеге.*

**РЕАБИЛИТАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **реабилитациялау.** *Реабилитацияланған кешеләр.*

**РЕАБИЛИТАЦИЯЛАУ** *к.* Реабилитация (1, 2 мәғ.) яһау; реабилитацияға эләктереү. *Ғәйепһеҙ ҡулға алынғандарҙы реабилитациялау.* ■ [*Аҡсаҡә — әсәһенә:*] *Олатайым халыҡ дошманы булмаған да баһа — уны аҙаҡ реабилитациялағандар бит.* Б. Бикбай.

**РЕАГЕ́НТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. хим.* Химик реакцияла ҡатнашҡан матдә. *Күмерле-һелтеле реагент.* ■ *Нефтле ҡатламға күп төрлө химик реагенттар ҡыуҙырыла.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 14 февраль.

**РЕАКТИ́В** [1] [*рус.* ⟨*лат.*] *и. хим.* Икенсе бер матдә менән үҙенсәлекле реакция биреп, уның нимәләлер барлығын йәки юҡлығын күрһәтә торған матдә. *Химик реактив. Реактив матдә.*

**РЕАКТИВ** [2] [*рус.* реактивный] *с.* **1.** *физ.* Кире тибеү көсөнән хасил булған. *Реактив көс (көүәт). Реактив хәрәкәт.* / Шул көстө файҙаланған. *Реактив артиллерия. Реактив двигатель. Реактив снаряд. Реактив турбина.* ■ *Тап шул саҡ баҫып торған тәңгәлдән генә зәңгәр бушлыҡҡа аҡ эҙ ҡалдырып, реактив самолёт осоп китте.* И. Ғиззәтуллин. *Яҡындағы ҡыуаклыҡ артынан бик ҙур тиҙлектә реактив миномет расчеты килеп сыҡты.* Ә. Ихсан. / Шул көстө файҙаланған двигателдәргә тәғәйенләнгән. *Реактив май. Реактив яғыулыҡ.*

**2.** *биол.* Тышҡы тәьҫиргә яуап биреүгә һәләтле. *Организмдың реактив мөмкинлеге. Реактив хәл.*

**РЕА́КТОР** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** *электр.* Ҡыҫҡа тоташҡан токтың көсөн сикләү һәм үҙгәрешле ток теҙмәһендә тейешле көсөргәнеште һаҡлау өсөн хеҙмәт иткән электр аппараты. *Электр реакторы.*

**2.** *хим.* Химик реакцияны билдәле температура һәм баҫым шарттарында тотоу өсөн хеҙмәт иткән аппарат. *Химик реактор.*

**3.** (*йәки* **атом реакторы**) *физ.* Атом ядроһының сынйырлы бүленеү реакцияһын башҡара торған ҡоролма.

**РЕАКЦИОН** [*рус.* реакционный] *с.* Реакция [2] мәнфәғәтендәге, реакция [2] яҡлы; яңылыҡҡа ҡаршы, иҫкелек яҡлы. *Реакцион көстәр. Реакцион политика. Реакцион режим. Реакцион рух.*

**РЕАКЦИОНЕ́Р** [*рус.*] *и.* Реакция [2] яҡлы кеше. *Реакционер ҡатын (йәки ҡыҙ).*

**РЕАКЦИОНЛАШЫУ** *к.* Реакцияға [2] ныҡ таяныу, реакция [2] юлына баҫыу.

**РЕАКЦИЯ** [1] [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Ниндәйҙер тәьҫиргә яуап рәүешендә барлыҡҡа килгән хәрәкәт йәки хәл. *Реакция тиҙлеге. Тамашасы реакцияһы.* / *биол.* Организмдың эске йәки тышҡы тәьҫиргә булған яуабы. *Һыуыҡҡа реакция. Эҫегә реакция. Әсегә реакция.*

**2.** *хим.* Ике йәки бер нисә матдәнең яңы матдә барлыҡҡа килтергән үҙ-ара тәьҫирләшеүе.

**РЕА́КЦИЯ** [2] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Еңелгән иҫке көстәрҙең, иҙеүсе синыфтарҙың революцион хәрәкәтте һәм төрлө ижтимағи прогресты үҙҙәренең хоҡуҡтарын һәм политик хакимлығын һаҡлау, кире ҡайтарыу маҡсатында баҫыу, ҡыҫыу политикаһы. *Политик реакция.* / Яңылыҡтың үҫеүенә арҡыры торған һәр төрлө ҡаршылыҡ, ҡаршы көс. *Революция йылдарында реакция йыйылып һөйләшкән өсөн генә түгел, тентеү ваҡытында өйөндә ҡыҙыл тышлы китап табылған өсөн дә эшселәрҙе төрмәгә япты, аҫты һәм атты.* З. Шәрки. *Аллегорик алым артабан М. Ғафури ижадында киңәйә һәм тәрәнәйә барып, реакция йылдарында шағирҙы мәҫәл жанрына алып килде.* Ғ. Рамазанов.

**РЕА́Л** [*рус.* ⟨*нем.*] *и. типогр.* Набор шрифты кассаһын ҡуйыр өсөн өҫтө бер яҡҡа ауыш итеп эшләнгән өҫтәл.

**РЕАЛИЗАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **реалләштерелеү.** *Күрһәтелгән осор эсендә пландан тыш 2,9 миллион һумлыҡ продукция етештерелде һәм реализацияланды.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 22 декабрь.

**РЕАЛИЗАЦИЯЛАУ** *к. кар.* **реалләштереү.** *Продукцияны реализациялау. Тауарҙы реализациялау.* ■ *Дүрт айҙа промышленность продукцияһын реализациялау планы 101,2 процентҡа үтәлде.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 22 май.

**РЕАЛИ́ЗМ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Тормоштағы ысын хәлде, ысын мөмкинлек һәм көстәр нисбәтен иҫәпкә алыу оҫталығы. *Планлаштырыуҙағы реализм.*

**2.** Әҙәбиәт һәм сәнғәттә: теге йәки был художестволы ижадҡа хас ысул менән ысынбарлыҡтың дөрөҫ итеп, объектив рәүештә сағылдырылыуы һәм шул сағылышҡа нигеҙләнгән йүнәлеш. *Сәнғәттәге реализм. Әҙәбиәттәге реализм.* ■ *Яҙыусы үҙен әйләндереп алған лаулы тормошто мөбәләгәләр, тәшбиктәр менән кәүҙәләндерергә тырыша; унда реализм әҙ, әммә уның төбөндә яҡшы теләк бар.* Д. Юлтый. **Тәнҡит реализмы** 19—20 быуат реализмы; буржуаз-помещиклыҡ короллоштоң хәл итмәҫлек ҡаршылыҡтарын асҡан шул осор сәнғәте һәм әҙәбиәтенең тормошто тәрән дөрөҫлөк менән сағылдырыуы. *Халыҡ менән, тормош менән тығыҙ бәйләнеш М. Ғафури поэзияһында .. тәнҡит реализмының артабан үҫеүе өсөн төп шарт булды.* Ғ. Рамазанов. **Социалистик реализм** әҙәбиәттә һәм сәнғәттә тормошто социалистик аң күҙлегенән сығып, халыҡсанлыҡ, партиялылыҡ, социалистик гуманизмдың идеологик принциптарына таянып һүрәтләгән ижади метод. *Социалистик реализм ул, бөтәһенән элек тормош дөрөҫлөгө, совет йәмғиәтенең туктауһыҙ алға барыуы.* Р. Ниғмәти.

**3.** Ысынбарлыҡтың аңдан тыш йәшәгәнен танып та, уны йә идеаль объекттарҙың йәшәү формаһы тип, йә субъекттан, танып белеү процесынан, тәжрибәнән тыш йәшәгән танып белеү объекты тип аңлатҡан идеалистик характерҙағы философия йүнәлеше. *Философик реализм.*

**РЕАЛИЗОВА́ТЬ** [*рус.*]: **реализовать итеү** *кар.* **реалләштереү.** *Продукцияны реализовать итеү. Тауарҙы реализовать итеү.*

**РЕАЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* **1.** Ысын тормош шарттарын иҫәпкә алып эш иткән кеше. *Реалист ҡатын (ҡыҙ). Тормошта реалист булып ҡалыу.*

**2.** Әҙәбиәт һәм сәнғәттә: реализм (2 мәғ.) юлында торған кеше. //*Реалист рәссам. Реалист яҙыусы.* ■ *Сәғит Агиш әҙәбиәтҡә реалист булып, заман ысынбарлығын асыҡ һүрәтләгән яҙыусы булып килде.* Б. Бикбай.

**3.** Реализмды (3 мәғ.) яҡлаған кеше. // *Реалист философ.*

**4.** *иҫк.* Реаль училище уҡыусыһы.

**РЕАЛИСТИК** *с.* **1.** Ысын тормош шарттарына нигеҙле. *Реалистик фекер.* ■ *Мөнәжәттәрҙә .. әхирәткә иҫе китмәгән кешенең реалистик ҡараштары, уйҙары сағылған.* Ә. Харисов.

**2.** Реализм (2 мәғ.) принциптарына нигеҙле; тормошсан. *Реалистик әҫәр.* ■ *Ҡасандыр, бик борон башҡорт халҡының һынлы сәнғәтенә реалистик һүрәттәр ҙә хас булған.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1968, № 2.

**РЕАЛЛЕК** *и.* **1.** Тормошта булған объектив күренеш; булмыш. *Тормош реаллеге. Тәбиғәт реаллеге.*

**2.** Ысын тормош шарттарына нигеҙләнгәнлек; тормошсанлыҡ. *Политиканың реаллеге.* ■ *Фекер һәм идея телдән башҡа йәшәй алмай. Фекер реаллеге тик телдә сағылыш таба.* К. Мәргән.

**РЕАЛЛӘШТЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **реалләштереү.**

**РЕАЛЛӘШТЕРЕҮ** *к.* **1.** Ниҙелер тормошҡа ашырыу; ғәмәлләштереү. *[Сыртланов:] Беҙ, экономистар, художниктың хыялый һүрәттәрен .. реалләштерәбеҙ. Беҙҙең эште тотоп ҡарарға мөмкин.* С. Агиш.

**2.** Ғәмәлгә үткәреү; һатыу, аҡсаға әйләндереү. *Тауарҙы реалләштереү.*

**РЕАЛЬ** [*рус.* реальный] *с.* **1.** Тормошта булған; ғәмәлдәге, ысын. *Реаль йөкләмә. Реаль ҡаҙаныш. Реаль мөмкинлек. Реаль нигеҙ. Реаль нәмә. Реаль хәл. Реаль ысынбарлыҡ.* ■ *Башҡорт әҙәби теле мәсьәләһе күҙгалып реаль төҫ алып өлгөрмәне, 1921 йыл дәһшәтле аслыҡ алға килеп баҫты.* Д. Юлтый.

**2.** Ысын тормош дөрөҫлөгөн аңлап, шуны иҫәпкә алыуға нигеҙләнгән; тормошсан, реалистик. *Реаль политика. Реаль план. Тормошҡа реаль ҡараш.* ■ *Тормошсан, реаль поэзия өсөн көрәшеүҙең мөһимлеген аңлау етмәй, шуны ғәмәлгә ашырырға кәрәк.* Ғ. Хөсәйенов.

◆ **Реаль керем** *эк.* Милли керемдең төрлө түләүҙәрҙен һуң ҡалып, халыҡ файҙаланған (тотонған йәки һаҡлаған) өлөшө. **Реаль эш** (*йәки* **хеҙмәт**) **хаҡы** *эк.* эш хаҡының һатып алыу һәләтлеге.

**РЕ́БУС** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Хәреф йәки башҡа билдәләр менән аралаштырып бирелгән һүрәткә ҡарап һүҙҙе табыуға ҡоролған башватҡыс. *Ребус сисеү.*

**РЕВА́НШ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Һуғышта, уйында еңелгәндән һуң еңеүсенән өҫкә сығыр өсөн ҡабат башланған көрәш. *Реванш биреү. Реваншҡа әҙерләнеү.* ■ *Пермь хоккейсылары Өфөләге уңышһыҙлыҡ өсөн реванш алды. Улар Өфө егеттәрен үҙҙәрендә 5:2 иҫәбе менән ҡыйратты.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 20 февраль.

**РЕВАНШИ́ЗМ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Һуғышта еңелгәндән һуң кире өҫтөнлөк алырға булған ынтылыш; реванш алыу маҡсатында яңы һуғыш асыуға йүнәлтелгән политика.

**РЕВАНШИ́СТ** [*рус.*] *и.* Реваншизм яҡлы кеше. ■ *Бөгөн дә беҙгә янаусылар аҙ түгел. Коммунизм төҙөүҙәге уңыштар бигерәк тә Америка Ҡушма Штаттары империалистарына, Көнбайыш Германия реваншистарына тынғы бирмәй.* З. Рафиков.

**РЕВАНШИСТИК** *с.* Реваншизмға һәм реваншисттарға мөнәсәбәтле. *Реваншистик дәғүә. Реваншистик политика. Реваншистик ынтылыш.*

**РЕВВОЕНСОВЕ́Т** [*рус.*] *и. тар.* 1918—1921 йылдарҙа Совет Россияһында фронттарҙағы,

армияларҙағы, флот һәм флотилияларҙағы хәрби властың һәм политик етәкселектең юғары коллегиаль органы.

**РЕВЕРА́НС** [рус. ⟨*фр.*] *и.* Бер аяҡты саҡ ҡына алға баҫып, сүгәләп сәләм биреү рәүеше (ҡатын-ҡыҙҙа). *Реверанс яһау.* ■ *Люся әсәһе ыңғайына ҡунаҡтарға йылмайып, арттараҡ торған еренән реверанс яһаны.* Ж. Кейекбаев.

**РЁВЕРС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *махс.* Миҙал йәки ваҡ аҡсаның арҡы яғы.

**2.** *тех.* Машинаның йәки уның часының кире хәрәкәтен тәьмин иткән механизм. *Йөрөтөү реверсын аяҡ менән күсереү өсөн Ғиззәтуллин ҡулайлама эшләне. Һөҙөмтәлә бульдозерсы хеҙмәте байтаҡҡа еңеләйҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 10 декабрь.

**РЕВИЗИОНИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Марксизм-ленинизм нигеҙҙәрен шик аҫтына алып, боҙоп күрһәтеп, ысынбарлыҡ күренештәрен яңыса, ижади ҡарап сығыу хәжәтенә һылтанып, уның төп фекерҙәрен фәнни булмаған теориялар менән алмаштырған оппортунистик ағым.

**РЕВИЗИОНИ́СТ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Ревизионизм яҡлы кеше.

**РЕВИЗИОНИСТИК** *с.* Ревизионистарға һәм ревизионизмға мөнәсәбәтле. *Ревизионистик тәнҡит. Ревизионистик позиция.*

**РЕВИ́ЗИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Берәй ойошма йәки вазифалы кеше эшмәкәрлегенең финанс һәм хужалыҡ яғынан дөрөҫлөгөн, законлылығын тикшереү эше. *Йыллыҡ ревизия. Ревизия комиссияһы. Ревизия отчёты. Хужалыҡҡа ревизия яһау.* ■ *Көндөҙ килә́тҡә ревизия яһаныла́р* — *ике йөҙ ботлап иген тулмай.* Б. Бикбай.

**2.** Берәй тәғлимәт йәки теория нигеҙенең боҙоп, үҙгәртеп яңынан ҡаралыуы.

**3.** *тар. ҡар.* **рәүиз.**

**РЕВИЗО́Р** [*рус.*] *и.* **1.** Ревизия (1 мәғ.) үткәреүгә хоҡуғы булған вазифалы кеше. *Ревизор вазифаһы.* ■ *Тағы ревизор килеп етә, йәнә ҡырын эште төбө-тамыры менән ҡутарып килтереп сығара.* «Һәнәк», 1966, № 9.

**2.** Тимер юл эшенең айырым тармаҡтарында эшләгән котролёр. *Контроль ревизоры. Хәрәкәт ревизоры.*

**РЕВИЗОРЛЫҠ** *и.* Ревизор вазифаһы. *Ревизорлыҡ итеү.*

**РЕВКО́М** [*рус.*] *и. тар.* **1.** Хәрби революцион комитет (1917 йылдың октябрендә Россияла большевистик Советтар эргәһендәге ҡоралды восстаниены әҙерләгән һәм үткәргән хәрби орган). / *һөйл.* Хәрби революцион комитет председателе. *Ревком булып эшләү.* ■ *Ә уныһына [белмәгәнемә] һин үҙең гәйепле, иптәш ревком!* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Революцион комитет (Совет власының граждандар һуғышы һәм сит илдәр интервенцияһы ваҡытында булған ваҡытлыса ғәҙәттән тыш органдары исеме). *Губерна ревкомы.* ■ *[Айбулат:] Мин хәҙер иптәш комиссар түгел, ревком председателе булам.* Һ. Дәүләтшина.

**РЕВКОМИ́ССИЯ** [*рус.*] *и.* Ревизия комиссияһы; дәүләт, партия органдарының, ижтимағи ойошмаларҙың эшен тикшереү өсөн төҙөлгән даими йәки ваҡытлы контроль органы. *Ревкомиссия ағзаһы. Ревкомиссия председателе.*

**РЕВМАТИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ауыртыныу, һыҙланыу менән барған йөрәк-ҡан тамыры системаһы һәм быуын ауырыуы. *Ревматизм төйөнө. Хроник ревматизм.* ■ *Еүеш, һалҡын окоптарҙа йоҡа шинель менән генә ҡыш үткәреүҙәр Шәһит өсөн эҙһеҙ үтмәне — ул ревматизм менән ҡаты сирләне.* Ғ. Әмири. *Шәмсиәне ревматизм бик йонсотҡан. Өҙлөкһөҙ һыҙланған. Ятһа, үҙе тора алмай башлаған.* Ғ. Ишбулатов.

**РЕВМА́ТИК** [*рус.*] *и.* Ревматизм менән ауырыған кеше. *Ревматиктар санаторийы.*

**РЕВМАТИ́К** *с.* Ревматизмға мөнәсәбәтле. *Ревматик ауырыу.*

**РЕВОЛЬВЕ́Р** [*рус.*] *и.* Әйләнеп торған барабанлы, күп яһаҡлы бәләкәй атыу ҡоралы. *Револьвер кобураһы.* ■ *Янһаровтың ҡулында Смит-Вессон системаһындағы өр-яңы револьвер ялтырап тора ине.* Б. Бикбай.

**РЕВОЛЬВЕРЛЫ: револьверлы станок** башы әйләнеп торған токарь станогы.

**РЕВОЛЮЦИОН** [*рус.* революционный] *с.* **1.** Революцияға (1 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Революцион байрам. Революцион гимн.* / *Революция* идеяларын сағылдырған; революция рухы менән һуғарылған. *Революцион агитация. Революцион армия. Революцион синыф.* / Революция үткәреүгә йүнәлтелгән. *Революцион көрәш.* ■ *Эшселәр араһында революцион хәрәкәт көсәйә.* Д. Юлтый. / Революция һөҙөмтәһендә урынлашҡан. *Эшселәр синыфының революцион диктатураһы. Революцион ойошмалар.* ■ *[Урындағы Советтар] ысын революцион тәртипте тәьмин итергә тейеш.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Берәй өлкәгә киҫкен үҙгәрештәр индергән, үҙгәртеп ҡорған. *Ғилми-техник революция.*

**3.** Нимәнеңдер үҫешендә яй барған процесты өҙөп, яңы сифатлы үҙгәрештәргә килтергән, ҡапыл һикерешкә нигеҙләнгән. *Революцион үҫеш.*

**РЕВОЛЮЦИОНЕ́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Революцион хәрәкәттә ҡатнашҡан кеше. *Революционерҙар Тоҙтүбәгә ҡуй көтөүе шикелле, гурты-гурты менән, бындағы ҡыйын тормош шарттарында йәшәү өсөн ебәрелгән.* З. Шәрҡи.

**2.** Фәндең ниндәйҙер өлкәһендә, техникала, сәнғәттә һ. б. һынылыш индергән кеше. *Техникалағы революционер. Фәндәге революционер.*

**РЕВОЛЮЦИОНЛАШТЫРЫУ** *к.* **1.** Революция идеяларын таратыу, революцион рух менән һуғарыу. *Кризистар эшселәрҙең аңын үҫтерә, уларҙы революционлаштыра.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 13 ғинуар.

**2.** Нимәнелер нигеҙенән үҙгәртеп ҡороу, сифат яғынан элеккенән яҡшыртыу. *Театр сәнғәтен революционлаштырыу.*

**РЕВОЛЮЦИОНЛАШЫУ** *к.* Революция идеялары менән һуғарылыу, революцион юлға баҫыу. *Халҡтың революционлашыуы.* ■ *Россияның бөтә буржуазияһы кеүек үк татар һәм башҡорт буржуазияһы ла халыҡтың артабан революционлашыуына тоҡҡарлыҡ яһау өсөн бөтөн көсөн һалды.* Р. Ҡузыев.

**РЕВОЛЮ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* 1. Йәмғиәттең бөтә социаль-экономик нигеҙен иҫкергән ижтимағи ҡоролоштан яңы прогрессив ҡоролошҡа күсергән киҫкен һынылыш. *Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы. Буржуаз революцияһы. Пролетар революцияһы. Социаль революция.* ■ *Осраған юлында бөтә кара көстәрҙе юк итеп революция өйөрмәһе килде. Тормоштоң аҫты-өҫкә әйләнде, илдә яңы көндәр тыуҙы.* А. Карнай. *Февраль революцияһынан һуң кала байы [Әхмәров] тағы ла ҡоласын киңерәк йәйергә самалағайны ла, Гәрәй капыл теҙгенен текә тартты.* Б. Бикбай. / *һөйл.* Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы. *[Талипов — Сәгиҙәгә:] Эйе, беҙҙең быуын кешеләре революция яһаны. Совет власын урынлаштырҙы.* М. Тажи.

2. *филос.* Яйлап үҫеү өҙөлөп, һан үҙгәрешенең сифат үҙгәрешенә киҫкен диалектик күсеше.

3. Фән, техника, сәнғәт һ. б. өлкәһендәге киҫкен үҙгәреш. *Аграр революция. Культура революцияһы.* ■ *Фәнни-техник революция шарттарында хеҙмәтте артабан үҙгәртеп короу кешеләрҙең дөйөм белем һәм профессиональ әҙерлегенә юғары талаптар куя.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.

**РЕВТРИБУНА́Л** [*рус.*] *и. тар.* Революцион трибунал (1917 йылда төҙөлөп, 1922 йылғы суд реформаһына тиклем йәшәгән, контрреволюцион элементтарға һәм саботажсыларға ҡаршы көрәш маҡсатында Совет хөкүмәте төҙөгән суд органдарының атамаһы).

**РЕВЮ́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ғәҙәттә көн үҙәгендә торған дөйөм темаға берләшкән, айырым күренеш, номерҙан торған эстрада йәки театр тамашаһы төрө.

**РЕГА́ЛИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* 1. Монарх власын күрһәткән нәмә (таж, аҫыл ташлы таяҡ, оҙон мантия, тәреле алтын шар һ. б.). *Батша регалиялары. Монарх регалиялары.*

2. Айырғыс билдә, орден, миҙал. *Спорт регалиялары. Полковник регалиялары.*

**РЕГА́ТА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Ишкәкле, елкенле йәки моторлы кәмәләрҙә барған ҙур ярыш. *Ишкәкле регата. Елкенле регата.*

**РЕ́ГБИ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Футболдың оҙонсараҡ туп менән уйнаған, тупты ҡул менән тоторға хоҡуҡ биргән бер төрө. *Регби командаһы.*

**РЕГБИ́СТ** [*рус.*] *и.* Регби уйнаған кеше. *Регбистар матчы.*

**РЕГЕНЕРА́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. тех.* Файҙаланғандан һуң кире элекке сифатына ҡайтарылған төрлө нәмә.

**РЕГЕНЕРАТИВ** [*рус.* регенеративный] *с.* Регенерацияға мөнәсәбәтле. *Организмдағы регенератив процестар. Регенератив цикл. Һауаны регенератив юл менән йылытыу.* / Регенерация өсөн тәғәйенләнгән. *Регенератив мейес.*

**РЕГЕНЕРА́ТОР** [рус. ⟨ *лат.*] *и.* Регенератив мейестең килгән һауаны, газды йылытыу өсөн хеҙмәт иткән камера һымаҡ төп өлөшө.

**РЕГЕНЕРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* 1. *тех.* Файҙаланылған материалдың билдәле операциялар аша ҡабаттан файҙаланыу өсөн тәүге хәленә кире ҡайтарылыуы. *Регенерация процесы. Регенерация яһау.*

2. *тех.* Мейескә килгән газ йәки һауаның шул уҡ мейестән сыҡҡан янған материал йылыһы иҫәбенә йылытылыуы.

3. *биол.* Организмдың өҙөлгән, зыянланған ағзаны, туҡыманы, күҙәнәкте яңынан үҫтереүе һәм бер өлөштән тотош организмдың яңынан үҫеүе. *Күҙәнәк регенерацияһы. Ҡан регенерацияһы.*

**РЕГЕНЕРАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. кар.* регенерациялау. *Регенерацияланган күҙәнәк.*

**РЕГЕНЕРАЦИЯЛАУ** *к.* 1. *тех.* Регенерация (1 мәғ.) яһау. *Ҡурғашты регенерациялау. Файҙаланылған майҙы регенерациялау.*

2. *биол.* Регенерация (3 мәғ.) һөҙөмтәһендә кире үҫтереү. *Организм туҡымаһын регенерациялау.*

**РЕ́ГЕНТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* 1. Монарх урынына юғары дәүләт хөкүмәтен тотҡан ваҡытлы хаким. *Коллегиаль регент. Яңғыҙаҡ регент.*

2. Хорҙағы (күберәк сиркәү хорындағы) дирижёр.

**РЕГЕНТЛЫҠ** *и.* 1. Монарх оҙаҡ булмай торғанда, бәлиғ булып бөтмәгәндә һ. б. монархик илдәрҙә бер йәки бер нисә кешенең ваҡытлы идаралығы. *Коллегиаль регентлыҡ. Яңғыҙаҡ регентлыҡ.*

2. Регент (2 мәғ.) дәрәжәһе йәки вазифаһы. *Регентлыҡ алыу.*

**РЕГИО́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Экономик, географик һ. б. үҙенсәлектәре менән берләшкән бер нисә өлкәне йәки илде эсенә алған киң район. *Ғәмәлдә тотош региондарҙы, континенттарҙы һәм океандарҙы үҙ мәнфәғәттәре зонаһы тип иғлан итеп, Ҡушма штаттар башҡа халыҡтарҙың суверенлығын һәм бойондороҡһоҙлоғон үҙ политик һәм экономик экспансионизмына буйһондороуға ҡуя.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 2 март.

**РЕГИОНАЛЬ** [*рус.* региональный] *с.* Регионға мөнәсәбәтле; урындағы. *Өлкә-ара региональ кәңәшмәләрҙә, Бөтә Союз күләмендә үткәрелгән ғилми сессияларҙа башҡорт фольклористарының тауышы йыш ҡына ишетелә башланы.* К. Мәргән. *Дүшәмбелә Урта Азия һәм Ҡаҙағстан республикалары әҙәби тәнҡитселәренең региональ конференцияһы үҙғарылды.* «Ағиҙел», 1969, № 8.

**РЕГИ́СТР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* 1. *махс.* Берәй нәмәнең исемлеге, теҙмәһе; шул исемлек, күрһәткес теркәлгән китап. *Журналдар регистры. Китаптар регистры.*

2. *муз.* Музыка инструменты йәки кеше тауышындағы өн диапазонының билдәле урыны. *Түбән регистр. Урта регистр. Юғары регистр.* ■ *Музыкаль яҡтан килгәндә, такмаҡ ғәҙәттә ике быуынлы була — беренсе быуыны юғары, икенсеһе түбән регистрҙа. Өс быуынлы такмаҡтар ҙа осрай.* Ә. Харисов.

3. *муз.* Тынлы һәм баҫмаҡлы музыка ҡоралдарындағы (орган, фисгармония, аккордеон һ. б.) бер үк тембрлы торбалар йәки телдәр төркөмө. *Музыкаль инструменттарҙың иң ҙур регистрлыһы — фортепиано.* Ғ. Сөләймәнов.

4. Ҡайһы бер машина йәки приборҙарҙағы бүлгес, регулятор. / Машинкалағы, иҫәп һ. б. машиналарындағы баҫмаҡтар рәте.

5. Бөтә совет караптары өҫтөнән техник күҙәтеү алып барған һәм уларға классификация үткәргән дәүләт органы.

**РЕГИСТРА́ТОР** [*рус.*] *и.* **1.** Регистрация алып барған кеше. *Регистратор вазифаһы. Регистратор булып эшләү.* ■ *Губернаның земство идаралығына халыҡтың иҫәбен алыуҙа регистратор итеп тәғәйенләнгән Андрей Кучкин килеп инде.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1969, № 1.

**2.** Ниндәйҙер күренештәрҙе теркәп барған автоматик прибор. *Метеор киҫәксәләре регистраторы. Регистраторҙы ебәреү.*

**3.** Ҡағыҙҙарҙы һаҡлау өсөн тәғәйенләнгән беркетмәле папка.

♦ **Коллежский регистратор** революцияға тиклемге Россияла тәүге, иң түбәнге рәсми дәрәжә.

**РЕГИСТРАТУ́РА** [*рус.*] *и.* Ойошманың регистрация үткәргән бүлеге.

**РЕГИСТРА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Иҫәпкә алыу, законлы көс биреү һ. б. маҡсатында нимәнеңдер яҙып, теркәлеп ҡуйылыуы, исемлеккә индерелеүе; теркәлеш. *Автор регистрацияһы. Регистрация ҡағыҙы. Регистрация листы. Регистрацияға алыу. Регистрацияға инеү. Регистрациянан үтеү. Регистрация үткәреү.*

**РЕГИСТРАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **регистрациялау.** *Депутатлыҡҡа кандидат итеп регистрацияланыу. Загста регистрацияланыу.*

**РЕГИСТРАЦИЯЛАУ** *к.* **1.** Регистрация үткәреү; нимәнелер иҫәпкә алыу, яҙып теркәү, исемлеккә индереү. *Декларацияны регистрациялау. Депутатлыҡҡа кандидат итеп регистрациялау. Кергән-сыҡҡан ҡағыҙҙарҙы регистрациялау. Китап-журналдарҙы регистрациялау. Нурҙарҙы регистрациялау.* ■ *Суд эше, ғәҙәттәгесә, башта секретарь Фәриҙәнең ҡулына тапшырылды. Ул уны процессуаль закон инструкцияһы буйынса регистрацияларға, тейешле номерын һуғырға бурыслы.* Х. Зарипов.

**2.** Никахҡа инеүҙе, өйләнешеүҙе загста теркәү. *Никахты регистрациялау.*

**РЕГЛА́МЕНТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Йыйылыш, ултырыштарҙы, конференция, сессия, съездарҙы алып барыу тәртибе. *Регламент ҡуйыу. Регламентты боҙоу. Регламентты һаҡлау.* ■ *Беҙ мәктәптә уҡыған саҡта, докладсы әҙ генә оҙонораҡ һөйләй башлаһа, президиумға «регламент» тигән бер генә һүҙҙән торған записка яҙып бирә торғайныҡ.* С. Агиш.

**РЕГЛАМЕНТА́ЦИЯ** *и.* Дәүләт органдары, ойошмалары һ. б. эшмәкәрлеге тәртибенең ҡағиҙә буларак буйһоноуы.

**РЕГЛАМЕНТЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **регламентлау.**

**РЕГЛАМЕНТЛАУ** *к.* Тейешле ҡағиҙәләргә буйһондороу. *Йыйылышты регламентлау. Эште регламентлау.*

**РЕГЛА́Н** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *с.* **1.** Еңе менән яурыны киҫелмәгән бөтөн тауарҙан тегелгән. *Реглан күлдәк. Реглан пальто.*

**2.** *и. мәғ. һөйл.* Шул рәүешсә тегелгән өҫ кейеме. *Мехлы реглан.*

**РЕГРЕ́СС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Юғары кимәлдән түбәнгә йүнәлгән үҙгәреш, артҡа китеш; тарҡалыш, деградация; *киреһе* прогресс. *Үҫештәге регресс.*

**РЕГРЕССИВ** [*рус.* регрессивный] *с.* Артҡа һөйрәгән, регресҡа алып барған. *Регрессив күренеш. Регрессив процесс.*

**РЕГУЛИРЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **регулирлау.**

**РЕГУЛИРЛАУ** *к.* **1.** Билдәле тәртипкә, ҡағиҙәгә буйһондороу; тәртипкә килтереү. *Хәрәкәтте регулирлау. Сауҙа эшен регулирлау.* ■ *Уҡыусыларҙың буш ваҡытын регулирлау .. мәктәп тарафынан башҡарыла.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1968, № 7.

**2.** Берәй механизмдың эшен яйлау; көйләү. *Йылылыҡ режимын регулирлау. Моторҙы регулирлау. Тауышты регулирлау.*

**РЕГУЛЯР** [*рус.* регулярный] *с.* **1.** Тигеҙ, бер сама менән дөрөҫ барған йәки алып барылған. *Транспорттың регуляр хәрәкәте. // Регуляр туҡланыу. Регуляр ял итеү.*

**2.** Билдәле бер ваҡыт араһында үткәрелеп торған. *Регуляр ойошторолған йыйылыш. Ревизияны регуляр үткәреү.*

**3.** Хәрби яҡтан ныҡлы ойошҡан, планлы рәүештә даими әҙерлек үткән. *Регуляр армия.* ■ *1798 йылда .. башҡорттар хәрби сословие тип иғлан ителгәс, регуляр башҡорт ғәскәрҙәре төҙөлә башлай.* Ә. Харисов.

**РЕГУЛЯРЛЫҠ** *и.* Эштең һ. б. тигеҙ, бер сама һәм барышы йәки алып барылышы; эштең регуляр барыуы. *Туҡланыу режимының мөһим ҡағиҙәһе регулярлыҡ: билдәле бер сәғәттәрҙә генә ашап өйрәнергә кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 21 август.

**РЕГУЛЯ́ТОР** [*рус.*] *и.* Механизмдың эшен тейешле яйға, көйгә килтереү өсөн хеҙмәт иткән ҡулайлама. *Автоматик регулятор. Баҫым регуляторы. Статик регулятор. Тауыш регуляторы. Тиҙлек регуляторы.* ■ *Магнитофондың таҫмаһы шыйылдап кире яҡҡа уралды. Зете регуляторҙы тағы ла бер бороуға сыйылдаған тауыш ҡалынайҙы.* Ф. Лоҡманов.

**РЕГУЛЯ́ЦИЯ** [*рус.*] *и. махс.* Организмдың ниндәйҙер функцияһының нормаль хәлгә килтерелеүе, тәртипкә һалыныуы. *Организмдағы йылылыҡ регуляцияһы.*

**РЕГУЛЯЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **регуляциялау.**

**РЕГУЛЯЦИЯЛАУ** *к.* Организмдың ниндәйҙер функцияһын нормаль хәлгә килтереү, тәртипкә һалыу; яйға һалыу. *Тын алышты регуляциялау.*

**РЕДА́КТОР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Тексты ҡарап төҙәткән кеше. *Мәҡәләнең редакторы. Махсус редактор. Техник редактор. Әҙәби редактор. Яуаплы редактор.* ■ *1922 йылға тиклем мәсьүл редактор булып Дауыт Юлтый һаналды.., техник редакторы Кавзан тигән журналист ҡатын ине.* Т. Йәнәби.

**2.** Баҫманы (китапты, газета, журналды һ. б.) донъяға сығарған ойошманың етәксеһе, йөкмәткеһен раҫлаусы кеше. *Баш редактор. Журнал редакторы. Газета редакторы.* ■ *Редактор үҙ газетаһына бирер өсөн ҡыҫҡа, ләкин асыҡ мәҡәләне башында әҙерләп бөткәйне инде.* Б. Бикбай. *Бер колхоз председателен үлтереп маҡтаған мәҡәлә баҫып, редакторыбыҙҙың күп-*

*тән түгел генә ауыҙы бешкәйне инде.* Н. Мусин.

**РЕДАКТОРЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **редакторлау.** *Редакторланған экземпляр. Китап яҡшы редакторланған.*

**РЕДАКТОРЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **редакторлау.** *Ҡулъяҙманы редакторлатып алыу. Редакторлатып наборға биреү.*

**РЕДАКТОРЛАУ** *к.* Тексты ҡарап төҙәтеү. *Мәҡәләне редакторлау.*

**РЕДАКТОРЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **редакторлау.**

**РЕДАКТОРЛЫҠ** *и.* Редактор эше, вазифаһы. ■ *«Яңы ауыл» газетаһы башта «Башҡортостан» газетаһына ҡушымта рәүешендә Дауыт Юлтый, Муса Йосопов иптәштәр редакторлығы аҫтында 1924 йыл 21 апрелдән сыға башланы.* Т. Йәнәби.

**РЕДАКЦИОН** [*рус.* редакционный] *с.* Редакторлауға һәм редакцияға мөнәсәбәтле. *Редакцион төҙәтмә. Редакцион эшкәртеү.* / Редакция (1 мәғ.) исеменән сыҡҡан. *Редакцион мәҡәлә.*

**РЕДА́КЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Баҫмаға (китап сығарыуға, газета-журналға һ. б.) етәкселек итеү эше. *Башҡорт һуғышсыларын граждандар һуғышы йылдарында туған телдә тәрбиәләү маҡсатында Ғ. Ғисмәти редакцияһында «Салауат» газетаһы сығарыла башланы.* «Ағиҙел», 1968, № 2.

**2.** Фекер йәки ҡағиҙәнең әйтелеш, бирелеш рәүеше. *Уставтың яңыртылған редакцияһы.*

**3.** Әҙәби, музыкаль һ. б. әҫәрҙең йәки уларҙың өлөшөнөң бер варианты. *Романдың һуңғы редакцияһы. Поэманың тәүге редакцияһы.*

**4.** Баҫма нәмәләр сығарыу йәки радио һәм телевидение тапшырыуҙарын әҙерләү менән шөғөлләнгән ойошма. *Газета редакцияһы. Журнал редакцияһы. Нәшриәт редакцияһы. Редакцияның культура бүлеге.* ■ *«Башҡортостан» редакцияһында 1926 йылға тиклем секретарь, унан һуң яуаплы редактор булып эшләп килəм.* Т. Йәнәби. *Телетайптар бер туҡтауһыҙ эшләй, стенографисткалар ашығыс хәбәрҙәр ҡабул итә. Редакция йоҡламай.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 19 февраль. / Шул ойошма урынлашҡан бина йәки бүлмә. *Редакцияға барыу. Редакцияла бик тығыҙ.*

**5.** Ҡулъяҙма тексты баҫырға, радио һәм телевидение тапшырыуҙарын сығарырға әҙерләгән хеҙмәткәрҙәр төркөмө. *Ауыл хужалығы әҙәбиәте редакцияһы. Музыкаль тапшырыуҙар редакцияһы. Уҡытыу-методик әҙәбиәт редакцияһы. Художестволы әҙәбиәт редакцияһы.*

**РЕДИ́СКА** [*рус.*] *и.* **1.** Әүернә сәскәләләр ғаиләһенә ингән ваҡ ҡыҙыл төплө, түңәрәгерәк япраҡлы йәшелсә.

**2.** *йыйн.* Шул йәшелсәнең ашай торған төбө. *Редиска салаты.*

**РЕДКОЛЛЕ́ГИЯ** [*рус.*] *и.* Редакция коллегияһы (китап, газета, журналды баҫмаға әҙерләп, донъяға сығарған коллектив). *Журнал редколлегияһы. Редколлегия ағзаһы. Редколлегия һайлау.* ■ *Дүртенсе курстағы редколлегия ағзаларын да йыйып алып, газетаны нисегерәк сығарыу тураһында кәңәшләштек.* Н. Мусин.

**РЕДУ́КТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Бер валдың әйләнешен икенсеһенә күсерә торған ҡулайлама. *Винтлы редуктор. Тешле редуктор. Ҡатнаш редуктор. Сылбырлы редуктор.*

**2.** Торба буйлап аҡҡан һыу, газдың баҫымын кәметеү йәки бер самала тотоу өсөн ҡулланылған прибор.

**РЕДУ́КЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *махс.* Ҡатмарлының ябайлашыуы; ҡатмарлының ябайға күсеүе; ниҙеңдер сағыштырмаса кәмеүе, көсһеҙләнеүе. *Һауа баҫымының редукцияһы.*

**2.** *биол.* Функцияһы юғалыу арҡаһында ағзаның бәләкәсәйеүе, төҙөлөш яғынан ябайлашыуы йәки бөтөнләй үлеүе.

**3.** *лингв.* Баҫымһыҙ хәлдә һуҙынҡы өндәрҙең көсһеҙләнеп йотолоуы. *Һуҙынҡылар редукцияһы.*

**РЕДУПЛИКА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. лингв.* Һүҙҙең тамырын, нигеҙен йәки үҙен ҡабатлау юлы менән башҡарылған һүҙ яһалышы (*мәҫ.* ҡабат-ҡабат, башҡа-башҡа). *Өлөшләтә редупликация. Тулы редупликация.*

**РЕДУ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. хәрби иҫк.* 20 быуатҡа тиклем оборона тотоу өсөн тәрән соҡор, ур менән уратып алынған хәрби нығытма. *Редуттар теҙмәһе.*

**РЕЕ́СТР** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и.* Берәй нәмәнең исемлеге, теҙмәһе. *Дәүләт ҡараптар реестры. Реестрҙан ҡарау. Реестрға теркәү.* / Төрлө эште, документтарҙы яҙып бара торған китап. *Почта реестры. Бухгалтерия реестры.*

**РЕЖИ́М** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Дәүләт ҡоролошо, идаралыҡ рәүеше. *Батша режимы. Демократик режим.* ■ *Колониаль режим һаҡсылары, әбей батша ялсылары халыҡтың телен ҡырҡып алған, ләкин йөрәгендәге ялҡынды һүндерә алмаған.* К. Мәргән.

**2.** Анығ билдәләнгән эш, ял, аш, йоҡо һ. б. тәртибе. *Көндәлек режим. Больница режимы. Режимды һаҡлау.* ■ *Баланың йәшен, сәләмәтлеген иҫәпкә алып, уға бөтә нәмәлә лә — эштә лә, уҡыуҙа ла, туҡланыуҙа ла, ялда ла, йоҡола ла билдәле режим булдырырға кәрәк.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1969, № 5.

**3.** Ниндәйҙер маҡсатта кәрәк булған ҡағиҙә һәм саралар системаһы. *Гидрологик режим. Туҡланыу режимы. Тупраҡтың һыу, һауа режимы. Хәүефһеҙлек режимы.* / Ниҙеңдер үҫеү һәм эшләү шарты. *Ҡоролманың эш режимы. Машинаның эш режимы. Телеграф режимы. Телефон режимы. Үҫемлектең йыллыҡ режимы.* ■ *Йөрәгегеҙ һеҙҙең йәшегеҙ өсөн тап килгән режимда эшләһә генә, күнекмәнең эффекты була.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1986, № 1.

◆ **Һаҡлыҡ режимы** хужалыҡта иң яҡшы һөҙөмтәне иң кәм тотоноуҙар иҫәбенә ирешеүгә, етештереү резерваттарын тулы файҙаланыуға йүнәлтелгән метод. *«Тура юл» газетаһын баҫыуҙы дауам иттерергә тырышыусылар булһа ла, һаҡлыҡ режимы мәсьәләһе быға ирек бирмәне.* Т. Йәнәби.

**РЕЖИССЁР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Спектаклдең, кинофильмдың радио тапшырыуҙарының һ. б. художество етәксеһе; постановканы ҡуйған кеше. *Кинофильм режиссёры. Театр режиссёры.* ■ *Йәш көстәрҙе сәхнә ҡануннына өйрәтеү, зәгиф пьесаларҙың тулы һәм йәнле бирелеүенә ирешеү өсөн режиссёр кәрәк.* Д. Юлтый. *Режиссёр кеше артистарҙы уйнарға ла, уйланырға ла, сәхнәлә, тормошта үҙен тоторға ла өйрәтергә тейеш.* С. Агиш.

**РЕЖИССЁРЛЫҠ** *и.* Режиссёр эше, режиссёр эшмәкәрлеге. / Спектаклдәр, фильмдар һ. б. ҡуйыуҙа художество етәкселеге; режиссура. *Режиссёрлыҡ мәктәбе үтеү. Спектаклгә режиссёрлыҡ итеү.* ■ *1927 йылдан башлап башҡорттоң үҙ артистарынан Х. Бохарский, Ғ. Ушанов һәм Зәйни иптәштәр үҙ постановкаларын ҡуйып, режиссерлыҡ эшен алып бара башланылар.* Ғ. Минһажев.

**РЕЖИССУ́РА** [*рус.*] *и.* Режиссер эше, режиссер эшмәкәрлеге. / Спектаклдәр, фильмдәр һ. б. ҡуйыуҙа художество етәкселеге; режиссерлыҡ. *Лев Толстойҙың «Ҡараңғылыҡ хөкөм һөргәндә» драмаһы Вәли Ғәлимовтың .. оҫта режиссураһы менән берләштерелгән бына тигән ансамбль!* Ғ. Әхмәтшин.

**РЕЗЕДА́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ҡәнәфер һымаҡтар ғаиләһенә ингән, башаҡланып торған аҡ, һары йәки йәшкелт һары сәскә атҡан түшәлеп үҫкән үҫемлек. *Хуш еҫле резеда.*

**РЕЗЁРВ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Яңы көс, байлыҡ, сара сығанағы. *Продукцияны арттырыу резервтары. Тупраҡтың уңдырышлылыҡ резервы. Комсомол — партияның резервы.* ■ *Сабынлыҡтар һәм көтөүлектәр — мал аҙығын арттырыу өсөн гәйәт ҙур резерв.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 18 февраль.

**2.** Кәрәк ваҡытҡа һаҡланған алдан әҙерләнгән нәмә, көс. *Аҙыҡ резервтары. Етештереү резервтары. Материаль резервтар. Резерв фонды.* ■ *Дәрте һәм көсө һынған дошман 8 июлдә һөжүмен туҡтатып, окоптар ҡаҙырға һәм тылдан резервтар килтерергә кереште.* Ә. Ихсан. / Файҙаланылмаған мөмкинлек, аҡса һ. б. *Производство ҡеүәттәрен файҙаланыу резервтары. Сырьё резервтары. Хеҙмәт резервтары. Энергетика резервтары.* ■ *Орлоҡсолоҡто яҡшыртыу һәм орлоҡтарҙың сифатын күтәреү иген етештереүҙе артабан арттырыуҙа ҙур резерв ул.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 7 март.

**3.** *хәрби* Кәрәк ваҡытта файҙаланыу өсөн командир ҡарамағында ҡалдырылған ғәскәр. *Баш командование резервы. Резерв ҡалдырыу. Резерв тотоу.*

**4.** *хәрби* Ғәскәри хеҙмәтте үткән кешеләрҙең кәрәк саҡта кире хеҙмәткә алырға әҙер тотолған составы. *Резервта тороу.* ■ *Һирәгәйеп ҡалған роталарҙы резервтан килгән ярты меңләп кеше менән тулыландырҙылар.* Д. Юлтый.

**РЕЗЕРВА́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ҡайһы бер сит илдәрҙә дәүләт һағы аҫтына алынған территория, тәбиғи байлыҡтар (хайуандар һәм үҫемлектәр донъяһы); заказник.

**2.** *кар.* **резерва́ция.**

**РЕЗЕРВА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Америкала, Көньяҡ Африкала һәм Австралияла: илдең ҡалған төп халҡы көсләп күсереп ултыртылған урын. *Резервацияға бикләү.*

**РЕЗЕРВЛАУ** *к.* Резерв (2 *мәғ.*) итеп һаҡлау; резервта тотоу. *Айырым резервлау. Дөйөм резервлау. Ҡатнаш резервлау.*

**РЕЗЕРВУА́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Газ һәм шайыҡлыҡ һаҡлай торған һауыт. *Тимер резервуар. Ер аҫты резервуары.* ■ *Ҡаланың алыҫтан күренеше һоҡланғыс. Төрлө ҙурлыҡтағы һанһыҙ торбалар, күккә ашҡан этажеркалар һәм эстакадалар, ғайәт эре резервуарҙар .. тағы әллә ниндәй ҡоролмалар үҙенә иғтибарҙы тарта.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 22 октябрь.

**РЕЗИДЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Урта быуаттарҙа: сит илдең ҡайһылыр бер илдә даими торған дипломатик вәкиле.

**2.** Империалистик дәүләттең протектораттағы ғәмәлдә хаҡимлыҡ иткән вәкиле.

**3.** Ҡайһылыр илдең сит дәүләттә торған гражданы.

**4.** Разведканың (3 мәғ.) сит дәүләттә даими йәшәгән вәкиле.

**РЕЗИДЕ́НЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Хөкүмәттең, дәүләт башлығының йәки ҙур вазифалы дәүләт кешеһенең даими торған урыны. *Президент резиденцияһы. Хөкүмәт резиденцияһы.*

**РЕЗИ́НА** [*рус.* ⟨ *лат.*]. *и.* Каучуктан вулканизация юлы менән алынған һығылмалы материал. *Техник резина. Резина производствоһы. // Резина итек. Резина кәмә.* ■ *Камил менән шофёр .. рези́на елеме алып кәмә ямарға ултырҙылар.* Ф. Иҫәнғолов.

**РЕЗИ́НКА** [*рус.*] *и.* *һөйл.* Юйғыс. *Ҡара резинкаһы. Ҡәләм резинкаһы.*

**РЕЗОЛЮ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Йыйылышта, ултырышта һ. б. ҡаралған мәсьәлә буйынса ҡабул ителгән ҡарар. *Резолюция ҡабул итеү.* ■ *Ултырыштан һуң, Мурзин, Григорий, Вася өсәүләшеп өйҙә ултырғанда, ҡабул ителгән резолюция буйынса бик күп кенә фекер алыштылар.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Вазифалы кешенең эш ҡағыҙына яҙылған күрһәтмәһе, бойороғо. *Ғаризаға резолюция һалыу.*

**РЕЗОНА́НС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *физ., тех.* Ниндәйҙер системалағы тирбәлештең тышҡы тәьҫир йоғонтоһонда көсәйеү күренеше (нәмәнең үҙ тирбәлеше тышҡы тирбәлешкә тигеҙ булғанда). *Параллель резонанс (йәки ток резонансы). Параметрик резонанс. Теҙмә резонанс.*

**2.** Ҡайһы бер нәмә йәки бинаның тауыш тулҡындарын сағылдырыу арҡаһында уның көсөн, оҙонлоғон арттырыу һәләте һәм шул сағылған тауыш. *Залдың резонансы. Тауыш резонансы.*

**3.** *күсм.* Хәл-ваҡиғаның халыҡ араһында яңғырашы. *Резонанс алыу.*

**РЕЗОНАНСЛЫ** *с.* Резонансҡа (1, 2 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Резонанслы тирбәлеш.*

**РЕЗОНА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* *физ., тех.* Резонанс күренеше барған система йәки нәмә. *Акустик резонатор. Асыҡ резонатор. Күләмле резонатор. Электромагнитлы резонатор.*

**РЕЗОНЁР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Аҡыл һатырға, өгөт-нәсихәт бирергә яратҡан кеше.

**2.** *театр., әҙ.* Классицизм осоро әҙәбиәтендә (17 быуат — 19 быуат башы) авторҙың һүрәтләнгән ваҡиғаларға ҡарата әйтелгән фекерен башҡаларға еткергән, ҡатнашыусыларҙың холҡона эхлаҡи баһа биргән, уларҙы өйрәтеп маташҡан персонаж. / *театр.* Шул персонаж ролен башҡарған артист амплуаһы.

**РЕЙД**[1] [*рус.* ⟨ *гол.*] *и. диңг.* Караптарҙың портта йәки портҡа яҡын якорҙа торған урыны. *Тышҡы рейд. Эске рейд. Рейдта тороу.*

**РЕЙД**[2] [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* **1.** *хәрби* Етеҙ хәрәкәтле ғәскәрҙең йәки партизан отрядының дошман тылына штаб, база, юлдарын һ. б. ҡыйратыу өсөн үтеп инеүе. *Кавалеристар рейды. Партизандар рейды. Танкистар рейды. Рейдҡа инеү. Рейдтан сығыу.* ■ *Башҡорт кавалерия дивизияһы 1943 йыл Донбастағы .. тәрән рейдта тиңһеҙ батырлыҡ күрһәткәне өсөн гвардия исеме алды.* Ә. Ихсан. *Боецтар рейдтан төндә генә ҡайтып төшөүгә ҡарамаҫтан, .. ҡапҡыланы ла нығытма ҡоророға кереште.* С. Агиш.

**2.** Ижтимағи ойошмаларҙың йәки матбуғат органдарының ҡушыуы буйынса активистар төркөмө үткәргән көтөлмәгән тикшереү эше. *Рейд үткәреү. Рейдта ҡатнашыу.* ■ *Иртәгә сәсеүгә әҙерлекте тикшереүҙең Бөтә Союз буйынса өс көнлөгө башлана. Районға ҡаланан рейд бригадаһы килде.* Б. Бикбай.

**РЕЙКА** [*рус.*] *и.* **1.** Йоҡа ғына тар таҡта. *Рейка ҡағыу.* ■ *Һәр мебель ҡатырға менән көпләп, ағас рейкалар менән ҡоршалған.* Н. Мусин.

**2.** Үлсәү өсөн эшләнгән бүлемле бурса. *Ҡайһы сакта уның [нефттең] юлы тығылып тора. Быны белер өсөн рейка менән мерниктағы нефтте үлсәп ҡарайһың.* С. Поварисов. / *геод.* Геодезик эштәрҙә ике нөктәнең сағыштырма бейеклеген билдәләү өсөн ҡулланылған бүлемле тар таҡта. *Шаҡмаҡлы рейка. Штрихлы рейка.*

**РЕЙС** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Карап, самолёт, машинаның һ. б. хәрәкәтендә башланған һәм тамамланған пункттар араһындағы юл. *Алыҫ рейс. Кире рейс. Рейс автобусы. Рейсҡа сығыу. Рейс самолёты.* ■ *Беренсе осоу уңышлы тамамланды. Шул көндө Мәрғүбә Сыртланованың экипажы биш рейс яһаны.* К. Мәргән.

**РЕЙСФЕ́ДЕР** [*рус.* ⟨*нем.*]. *и.* **1.** Тушь йәки иҙелгән буяу менән һыҙыҡ һыҙа торған ҡорал.

**2.** Ҡыҫҡа ҡәләм киҫәге тоттороу өсөн ҡыҫҡысы булған металл көпшә. *Рейсфедерға ҡәләм ҡуйыу.*

**РЕЙСШИ́НА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Параллель һыҙыҡ үткәреү өсөн бер яҡ башында тура мөйөшлө арҡыры таҡтаһы булған ҙур һыҙғыс.

**РЕЙТУЗ** [*рус.* рейтузы ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Һыбай йөрөү өсөн тегелгән тар салбар.

**2.** Ҡатын-ҡыҙҙың йәки балаларҙың тәнгә һылашып торған, бәйләнгән оҙон ыштаны.

**РЕЙХСТА́Г** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. тар.* Германияның парламенты (1933 йылға тиклем һайланып, фашизм ваҡытында тәғәйенләнеп ҡуйылған, 1945 йылға тиклем йәшәгән) һәм шул парламент урынлашҡан бина.

**РЕ́КВИЕМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Католиктарҙа кеше үлгәс башҡарыла торған ғибәҙәт.

**2.** Оркестрлы хор башҡарған траурлы музыка әҫәре. *Моцарт реквиемы.* ■ *Яңғырай күңелдә бөтөнләй икенсе бер көйөң: ул гимн — юлдағы ғүмергә, ул тынған һулышҡа — реквием.* З. Шаһбазов.

**РЕКВИЗИ́Т** [рус. ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *театр., кино* Тамаша барышында актёрҙарға кәрәк булған ысын йәки яһалма нәмәләр. *Театр реквизиттары.* ■ *Спектаклгә әҙерлек барған бүлмәлә .. берәүҙәр көҙгө алдында грим яға, икенселәр кәрәкле реквизиттарҙы барлай.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 12 июнь.

**2.** *юр.* Алыш-бирешкә, документҡа юридик көс бирә торған мотлаҡи формаль элемент (уның юҡлығы алыш-биреште, документты юҡҡа сығара).

**РЕКВИЗИТСЫ** *и. театр., кино* Реквизит өсөн (1 мәғ.) яуаплы кеше.

**РЕКВИЗИ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Айырым шәхес йәки ижтимағи ойошма милкенең дәүләт органдары, һуғыш ваҡытында хәрби властар тарафынан бөтөнләйгә йәки ваҡытлыса тартып алыныуы. *Яңы хөкүмәт мөлкәтле синыфтарға реквизициялар яһап һәм налог һалып .. революцион армияны бөтә кәрәк нәмә менән тәьмин итәсәк, .. һалдат семьяларының хәлен яҡшыртасаҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**РЕКВИЗИЦИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **реквизициялау.** *Реквизицияланған иген. Реквизицияланған тауар. Реквизицияланған транспорт.*

**РЕКВИЗИЦИЯЛАУ** *ҡ.* Реквизиция яһау. *Малды реквизициялау. Мөлкәтте реквизициялау.*

**РЕКЛА́МА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Теге йәки был тауарға һорау тыуҙырыу маҡсатында уның ҡулланылыу үҙенсәлектәрен, күрһәтелгән хеҙмәттең төрҙәрен халыҡҡа киң хәбәр итеү эше. *Матбуғат рекламаһы. Сауҙа рекламаһы. Реклама агентлығы. Реклама баҫмаһы. Реклама бюроһы.* / Танытыу, популярлаштырыу маҡсатында кемдер, нимәләр тураһында мәғлүмәт таратылыуы. *[Әмирхановтың ҡатынының] аяғында боронғо татар журналдарының тышына реклама рәүешендә төшөрөп ҡуйыла торған бейек күтәрмәле сәмсәле итек.* С. Агиш.

**2.** Шундай хәбәрҙе эсенә алған иғлан, плакат. *Театр рекламаһы.* ■ *Реклама ҙур урын алды: халыҡ алдында спорт мастерҙарының сығыштары ойошторолдо, ярыштар газеталарҙа яҡтыртылды.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 28 февраль.

**РЕКЛАМАЛАУ** *ҡ.* Реклама аша иғлан итеү, белдереү. *Яңы фильмдарҙы рекламалау.* / Танытыу, популярлаштырыу маҡсатында кем, нимә тураһындалыр мәғлүмәт таратыу. *Яңы дарыуҙы рекламалау.*

**РЕКЛАМАСЫ** *и.* Реклама әҙерләгән кеше.

**РЕКЛАМА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. сауҙа, эк.* Түбән сифатлы тауарға ризаһыҙлыҡ белдереп, күрелгән зыянды ҡайтарыуҙы талап иткән дәғүә. *Рекламация биреү. Рекламация яҙыу.* ■ *Һатып алыусыларҙың талабы кәнәғәтләндерелә, улар ҙан рекламациялар бөтөнләй булмай башланы.* Ғ. Вәлиев.

**РЕКЛАМАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **рекламациялау.** *Рекламацияланған тауар.*

**РЕКЛАМАЦИЯЛАУ** *ҡ.* Рекламация биреү; рекламация яҙыу.

**РЕКОГНОСЦИРОВКА** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* **1.** *хәрби* Һөжүм алдынан командирҙарҙың дошман позицияһын, урын шарттарын өйрәнеүе. *Рекогносцировка үткәргән төркөм. Рекогносцировка яһау.* ■ *Кусимов командирҙарҙы алып, рекогносцировкаға китте.* С. Әлибаев.

**2.** *геод.* Геодезик эш алдынан урындың өйрәнелеүе.

**РЕКОГНОСЦИРОВКАЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **рекогносцировкалау.**

**РЕКОГНОСЦИРОВКАЛАУ** *ҡ.* Рекогносцировка яһау, рекогносцировка үткәреү.

**РЕКОМЕНДАЦИЯ** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* **1.** Яңы эшкә урынлашҡан йәки берәй ойошмаға ағза булып ингән кешегә ыңғай яҡтарын күрһәтеп ышандырып бирелгән яҙма йәки телдән әйтелгән баһа. *Рекомендация хаты. Рекомендация алыу. Рекомендация биреү.* ■ *Партия ойошмаһы Хәлимәгә уҡыуға китергә рекомендация бирә.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Кәңәш, тәҡдим. *Жуковский рекомендацияһы буйынса В. И. Даль 1833 йылда Ырымбурға китә.* Ә. Усманов. *Комиссияларҙың рекомендациялары дәүләт һәм йәмәғәт органдарында, учреждениеларҙа һәм ойошмаларҙа мотлаҡ ҡаралырға тейеш.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**РЕКОНСТРУКТИВ** [*рус.* реконструктивный] *с.* Реконструкцияға мөнәсәбәтле. *Реконструктив тәҡдим. Реконструктив хәрәкәт. Халыҡ хужалығы үҫешендәге реконструктив осор.*

**РЕКОНСТРУКЦИЯ** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* **1.** Яҡшыртыу, камиллаштырыу һ. б. маҡсатында нимәнеңдер нигеҙҙән үҙгәртеп ҡоролоуы. *Социалистик реконструкция. Техник реконструкция. Реконструкция яһау.* ■ *Күп кенә алдынғы предприятиелар реконструкция үткәрә, иҫке ҡорамалдарҙы, королмаларҙы яңы, юғары етештереүсәнлерәккә алмаштыра.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 22 май. / Эшен яҡшыртыу йәки яңы эштә файҙаланыу маҡсатында бинаның үҙгәртеп ҡоролоуы. *Дворецҡа реконструкция. Ғибәҙәт йортона реконструкция. Театр бинаһына реконструкция.*

**2.** Нимәнеңдер һаҡланған ҡалдығы, яҙып ҡалдырылыуы һ. б. билдәһе буйынса тәүге рәүешкә ҡайтарылыуы. *Боронғо һәйкәлдәргә реконструкция.*

**РЕКОНСТРУКЦИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **реконструкциялау.** *Реконструкцияланған завод. Реконструкцияланған һәйкәл.* ■ *Башҡорт дәүләт филармонияһы, хореография училищеһы биналары реконструкцияланды.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 21 ғинуар.

**РЕКОНСТРУКЦИЯЛАУ** *ҡ.* **1.** Яҡшыртыу, камиллаштырыу һ. б. маҡсатында нимәнелер нигеҙенән үҙгәртеп ҡороу. *Дворецты реконструкциялау. Театр бинаһын реконструкциялау.* ■ *Фәнни техник прогресты тиҙләтеү, эшләп килгән производствоны техник яҡтан ҡайтанан ҡоралландырыу һәм реконструкциялау буйынса эш активлашты.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 9 ноябрь.

**2.** Нимәнеңдер һаҡланған ҡалдығы, яҙып ҡалдырылыуы һ. б. билдәһе буйынса тәүге рәүешенә ҡайтарыу. *Археологик ҡомартҡыларҙы реконструкциялау.*

**РЕКОРД** [*рус.* ‹ *ингл.*] *и.* **1.** Спорт ярышында ҡаҙанылған иң юғары күрһәткес. *Донъя рекорды. Олимпия рекорды.*

**2.** Берәй төрлө хеҙмәт, хужалыҡ өлкәһендәге иң юғары күрһәткес. *Ҡорос иретеүҙә ҡуйылған рекорд.* ■ *1915—16 йыл революцияға тиклем булған осорҙа продукцияны сығарыу күләме ягынан рекорд йылы ине.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929. *Ләләгә хөрмәт һәм дан! Ул [заводта] ҙур рекорд ҡуйған.* Н. Иҙелбай.

**РЕКОРДЛЫ** *с.* Рекорд булып торған, рекорд тип танылған; иң юғары, иң ҙур. *Рекордлы тиҙлек. Рекордлы һөҙөмтә.*

**РЕКОРДСМЕН** [*рус.* ‹ *ингл.*] *и.* *ҡар.* **рекордсы.**

**РЕКОРДСЫ** *и.* **1.** Рекорд ҡуйған кеше; рекордсмен.

**2.** Ниндәйҙер сифаты менән рекордлы күрһәткескә ирешкән йорт хайуаны. *Рекордсы һарыҡ.*

**РЕКРУТ** [*рус.* ‹ *фр.*] *и. иҫк.* Рус [18—19 быуат] һәм сит ил армияларында ялланып йәки мәжбүри хеҙмәт иткән кеше. *Рекрут йыйыу. Рекрутҡа биреү.* ■ *Ҡаралырға китер алдынан рекруттар .. урам буйында йырлашып йөрөнө.* Ж. Кейекбаев.

**Рекрут квитанцияһы** армияла үҙе теләп хеҙмәт итергә теләгән кешене яллаған өсөн билдәле күләмдә аҡса түләгәнлекте, шуның нигеҙендә рекрут йөкләмәһенән бушатыу кәрәклеген күрһәткән документ. **Рекрут йөкләмәһе** Россияла 18—19 быуаттарҙа дөйөм мәжбүри хәрби хеҙмәтте индергәнгә тиклем һалым түләгән ҡатламдарҙан билдәле һанда кеше йыйыу юлы менән регуляр армияны комплектлау системаһы.

**РЕКРУТЛЫҠ** *и.* Рекрут хеҙмәте; рекрут йөкләмәһе. *Рекрутлыҡта йөрөү. Рекрутлыҡтан ҡотолоу.*

**РЕКТИФИКАТ** [*рус.*] *и. махс.* Ректификация юлы менән айырып алынған шыйыҡлыҡ. *Ректификат спирты.*

**РЕКТИФИКАТЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ректификатлау.** *Ректификатланған спирт.*

**РЕКТИФИКАТЛАУ** *ҡ. махс.* Бергә ҡушылған шыйыҡлыҡтарҙы ректификация юлы менән бер-береһенән айырып алыу. *Спиртты ректификатлау. Ташкүмер ыҫмалаһын ректификатлап ҡыуҙыралар.*

**РЕКТИФИКАТОР** [*рус.* ‹ *фр.*] *и. махс.* Ректификация колонкаһы (*ҡар.* **ректификация**).

**РЕКТИФИКАЦИЯ** [*рус.* ‹ *лат.*] *и. махс.* Ҡушылған шыйыҡлыҡтарҙы бер-береһенән айырыу ысулы. *Өҙлөкһөҙ ректификация. Периодик ректификация. Ректификация аппараты. Ректификация процесы.* **Ректификация колонкаһы** ректификатлай торған аппарат. *Ацетондың «А» маркалы юғары сифатлыһын алыу өсөн, ректификация колонкаларын алмаштырып торорға кәрәк.* Совет Башҡортостаны», 1968, 9 июль.

**РЕ́КТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Университеттың һәм башҡа юғары уҡыу йортоноң етәксеһе. *Институт ректоры.*

**РЕКТОРЛЫҠ** *и.* Ректор вазифаһы; ректор эшмәкәрлеге. *Ректорлыҡ итеү.*

**РЕКТОРА́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Юғары уҡыу йортоноң ректор етәкселегендәге идараһы. / Шул идара урынлашҡан бүлмә. *Университет ректораты.*

**РЕЛЕ́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Электр ағымын билдәле шартта өҙөп-ялғап тора торған автоматик прибор. *Акустик реле. Контактлы реле. Магнитлы реле. Йылылыҡ релеһы.*

**РЕЛИ́КВИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Алла, пәйғәмбәр йәки әүлиә исеменә бәйләп изгеләштергән нәмә һәм изге бәндәләрҙең тылсымлы шифалы көскә эйә тип һаналған мумияһы. *Сиркәү реликвияһы.*

**2.** Иҫтәлек, төҫ, ядкәр итеп ҡәҙерләп һаҡлана торған нәмә. *Тарихи реликвия.* ■ *Юҡ, уларҙы [хаттарҙы] таҫлап һалып ҡуйҙым, адресаты, бәлки, табылыр. Бәлки, тарихсының өҫтәлендә бер реликвия булып ҡабыныр.* Х. Ғиләжев.

**РЕЛИ́КТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Боронғо дәүерҙән һаҡланып ҡалған күренеш йәки нәмә. *Боҙлоҡ дәүере реликттары. // Реликт йәнлектәр. Реликт үҫемлектәр.* ■ *Ҡайһы бер ҙур ҡулдәрҙә боронғо геологик дәүерҙәрҙән һаҡланып ҡалған эре йән эйәләре — реликт януарҙар йәшәгәне билдәле.* Д. Бураҡаев.

**РЕЛЬЕ́Ф** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Төрлө ҡалҡыу, түбән урындары менән билдәләнгән ер өҫтө, диңгеҙ, океан төбө. *Урындың рельефы.* ■ *Даланың йомшаҡ, тигеҙ рельефында улар [тауҙар] вулканға оҡшап ҡалҡып тора.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 7 октябрь.

**2.** Яҫылыҡтан ҡалҡыу итеп һүрәт төшөрөү ысулы һәм шул ысул менән төшөрөлгән һүрәт. *Рельеф менән һүрәт төшөрөү.*

**РЕЛЬЕФЛЫ** *с.* **1.** Яҫылыҡ өҫтөндә ҡалҡып, ҡабарып торған. *Рельефлы биҙәк.* / Яҫылыҡ өҫтөндә ҡалҡып, ҡабарып торған биҙәкле. *Рельефлы обой. Рельефлы туҡыма. Рельефлы һүрәт.*

**2.** *күсм.* Асыҡ, тәьҫирле. *Рельефлы, ҡалҡыу итеп һүрәтләү һәләте З. Биишева талантының иң гүзәл һәм көслө яҡтарының береһе.* М. Минһажетдинов.

**РЕЛЬС** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Вагон, вагонетка йөрөтөр өсөн шпалдарға бер-береһенә тоташтырып һалына торған махсус киҫелештәге оҙон тар ҡорос бурса. *Рельс һалыу.* ■ *Беҙҙең полк юл буйлап, шпалдар, рельстар өҫтөнән бара. Бер генә поезд да йөрөмәй.* Д. Юлтый. *Рельс буйлап вагонеткалар йөк тарта.* М. Тажи. / Ниндәйҙер маҡсатта файҙаланылған шул металл киҫәге. *Бер аҙҙан Алтынбикә эш көнө бөткәнен белдереп .. ҡыуыш алдындағы ҡаҙыҡҡа эленгән ҡорос рельсҡа балта төйҙәһе менән бер нисә тапҡыр һуғып шаңғыратты.* М. Тажи.

**РЕЛЯТИВИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Кеше белеменең тулы түгеллегенән сығып, объектив дөрөҫлөктө өйрәнеү мөмкинлеген инҡар иткән методологик принцип. *Релятивизмдың гносеологик сығанағы.*

**РЕЛЯТИВИ́СТ** [*рус.*] *и.* Релятивизм яҡлы кеше.

**РЕЛЯТИВИСТИК** [1] *с.* Релятивизмға һәм релятивистҡа мөнәсәбәтле. *Релятивистик ҡараш.*

**РЕЛЯТИВИСТИК** [2] *с. махс.* Сағыштырмасалыҡ теорияһына нигеҙләнгән. *Релятивистик астрофизика. Релятивистик механика.*

**РЕМА́РКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Көтмәгәндә яһалған иҫкәрмә, күрһәтмә. *Ремарка индереү.*

**2.** Авторҙың пьеса тексына ваҡиғаны, шәхестең тышҡы ҡиәфәтен, ҡылығын ҡыҫҡаса һүрәтләп биргән аңлатмалары (ғәҙәттә, йәйә эсенә алына). *Ремаркалар персонаждарҙың хәрәкәтен генә күрһәтмәй, эске донъяһын асыуға ла ярҙам итә.* М. Ғималова.

**РЕМИЛИТАРИЗА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Элек ҡоралһыҙландырылған дәүләттең яңынан ҡоралланыуы. *Ремилитаризация яһау.*

**РЕМИЛИТАРИЗАЦИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ремилитаризациялау**. *Ремилитаризацияланган дәүләт.*

**РЕМИЛИТАРИЗАЦИЯЛАУ** *ҡ.* Ремилитаризация яһау; яңынан ҡоралландырыу.

**РЕМО́НТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Боҙолған, һынған, иҫкергән һ. б. нәмәне йүнәтеү, төҙәтеү эше. *Ағымдағы ремонт. Капиталь ремонт. Ремонт базаһы. Ремонт ойошмалары. Ремонт эше. Ремонт яһау.* ■ *[Рамазан:] Был ремонт тигәнең бер ваҡытта ла бөтәсәк түгел. Иҫкеләрен төҙәтеп өлгөрмәйһең, яңылары ватыла.* Ә. Вәли.

**РЕМОНТЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ремонтлау.** *Мәктәп ремонтланды. Техника ремонтлана. Юл капиталь ремонтланды. Ремонтланган машина.*

**РЕМОНТЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ремонтлау.** *Өйҙө ремонтлатыу.*

**РЕМОНТЛАУ** *ҡ.* Ремонт яһау; йүнәтеү, төҙәтеү. *Аяҡ кейемен ремонтлау. Вагон ремонтлау заводы. Ремонт бригадаһы. Ремонтлау эше. Тракторҙы ремонтлау.* ■ *Булат Өмөтбаев тимерсе, оҫта ҡуллы кеше. Хатта ул бер ваҡыт ҡатмарлы молотилканы ремонтлаған, тракторҙы ла тиҙ төшөнөр.* Б. Бикбай.

**РЕМОНТЛАШЫУ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **ремонтлау.** *Машина ремонтлашыу.*

**РЕМОНТСЫ** *и.* Ремонт яһаусы. *Ремонтсылар трактор төҙәтә.* ■ *Ремонттан сыҡҡан тракторҙар хужалыҡтарға юл тота. Бында күп ремонтсылар смена заданиеларын арттырып үтәй.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 28 февраль.

**РЕНЕГА́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡарашын, фекерен үҙгәртеп, икенсе яҡҡа сыҡҡан кеше; мөртәт.

**РЕНЕГАТЛЫҠ** *и.* Ренегат ҡылығы; мөртәтлек. *Ренегатлыҡ позицияһы.*

**РЕНЕССА́НС** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. шул уҡ* **яңырыу** дәүере (*ҡар.* **яңырыу**). *Ренессанс архитектураһы. Ренессанс культураһы. Ренессанс әҙәбиәте. Иртә ренессанс. Һуңғы ренессанс. Юғары ренессанс.*

**РЕ́НТА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** *эк.* Капитал, мөлкәт йәки ерҙән бер ниндәй көс түкмәй даими рәүештә алына торған төшөм. *Дифференциаль рента. Натураль рента. Акса рентаһы. Ер рентаһы. Рента менән йәшәү. Рентаға ер биреү.*

**2.** *фин.* Ҡайһы бер капиталистик илдәрҙә: дәүләт займы облигацияларына түләнгән процент. *Рента түләүе.*

**РЕНТАБЕЛЛЕ** *с.* Сығымдарҙы ҡаплаған, хужалыҡ йәһәтенән файҙалы; килемле. *Рентабелле хужалыҡ. Рентабелле ҡулланыу. Хужалыҡты рентабелле итеү.* ■ *Был йылдарҙа химия заводындағы көкөрт кислотаһы цехы ... рентабеллегә әйләнде.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 28 февраль.

**РЕНТАБЕЛЛЕК** *и.* Хужалыҡ йәһәтенән файҙалылыҡ; килемлелек. *Дөйөм рентабеллек. Халыҡ хужалығы рентабеллеге. Хужалыҡ иҫәбендәге предприятиеның рентабеллеге. Рентабеллекте күтәреү.*

**РЕНТГЕ́Н** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* **1.** (*йәки* **рентген нурҙары**) Үтә күренмәгән есемдәр аша үтә алған ҡыҫҡа электромагнит тулҡынлы күҙгә күренмәгән нурҙар. *Рентген нурҙары. Рентген сығанағы. Рентген һүрәте.* / Есемдең шул нурҙар менән яҡтыртылыуы. *Рентген күрһәтә. Рентген үтте.*

**2.** (*йәки* **рентген аппараты**). Рентген нурҙары менән яҡтыртып ҡарай торған аппарат.

**РЕНТГЕНОГРА́ММА** [*рус.*] *и.* Рентген нурҙары ярҙамында фотопластинкаға йәки фотоплёнкаға төшөрөлгән һүрәт.

**РЕНТГЕНОГРАФИК** *с.* Рентгенографияға мөнәсәбәтле. *Рентгенографик һүрәт. Көсөргәнеште рентгенографик билдәләү.*

**РЕНТГЕНОГРА́ФИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Үтә күренмәгән нәмәләрҙең эске төҙөлөшөн рентген нурҙары ярҙамында тикшереү һәм үтеп ингән нурҙарҙы фотоплёнкаға төшөрөү юлы. *Матдәләрҙең рентгенографияһы. Күкрәк ситлеге рентгенографияһы.*

**РЕНТГЕНО́ЛОГ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Рентгенология һәм рентгенотерапия буйынса белгес. *Рентгенолог булып эшләү.* // *Рентгенолог врач.*

**РЕНТГЕНОЛОГИК** *с.* Рентгенологияға мөнәсәбәтле.

**РЕНТГЕНО́ЛОГИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] Медицинаның рентген нурҙары ярҙамында диагноз ҡуйыу, дауалау юлдарын өйрәнгән тармағы. *Медицина рентгенологияһы. Рентгенология бүлеге.*

**РЕНТГЕНОСКОПИ́Я** [*рус.*] *и.* Эске төҙөлөшөн тикшереү өсөн тәнде рентген нурҙары менән яҡтыртыу һәм махсус экранда шәүләһен ҡарау эше. *Ашҡаҙан рентгеноскопияһы. Күкрәк ҡыуышлығы рентгеноскопияһы.*

**РЕНТГЕНОТЕРАПИ́Я** [*рус.*] *и.* Рентген нурҙарын дауалау маҡсатында ҡулланыу эше. *Дистанциялы рентгенотерапия. Ҡыҫҡа дистанциялы рентгенотерапия.*

**РЕОСТА́Т** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Электр тогының көсөн йәки электр сымындағы көсөргәнеште көйләй торған аппарат. *Идаралы тоташтырғыс реостат. Шыйыҡлыҡ реостаты. Ягыулыҡ реостаты.*

**РЕПАРА́ЦИЯ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Һуғыш асып үҙе еңелгән ил тарафынан еңгән ил файҙаһына ул һуғыштан күргән зыяндың аҡсалата йәки натуралата түләнеүе. *Аҡсалата репарация. Репарация талабы. Репарация алыу. Репарация түләү.*

**2.** *биол.* Тереклек күҙәнәктәренең зыянланғандан һуң кире яралыу һәләте.

**РЕПАТРИА́НТ** [*рус.*] *и.* Репатриацияға эләгеп ҡайтҡан кеше.

**РЕПАТРИА́ЦИЯ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Эмигранттарҙың, яңынан гражданлыҡ хоҡуғы биреп, үҙ иленә кире ҡайтарылыуы. / Һуғыш арҡаһында сит илгә эләккән хәрби тотҡон һәм башҡа кешеләрҙе тыуған иленә кире ҡайтарыу эше. *Репатриация үткәреү (яһау). Репатриацияға эләгеү.*

**РЕПАТРИАЦИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **репатриациялау.** *Репатриацияланған эмигранттар.*

**РЕПАТРИАЦИЯЛАУ** *ҡ.* Репатриация яһау йәки үткәреү; репатриацияға эләктереү. *Эмигранттарҙы репатриациялау.*

**РЕПЕРТУА́Р** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Театрҙа, концертта башҡарылған драматик, музыкаль һ. б. әҫәрҙәр йыйылмаһы. *Айлыҡ репертуар. Классик репертуар. Эстрада репертуары.* ■ *Бөгөнгө йыр-көй репертуарында урын алған боронғо башҡорт халыҡ көйҙәренең байтағы һуңғы ике-өс йөҙ йыл эсендә барлыҡҡа килгән.* Ә. Харисов.

**2.** Кемдер башҡарған ролдәр, номерҙар, музыкаль һәм әҙәби әҫәрҙәр йыйымы. *Башҡорт халыҡ бейеүҙәре ансамбленең репертуары. Йырсы репертуары.* ■ *Яҙыусылар ҡусмә театр репертуары өсөн ашығыс рәүештә әҫәрҙәр яҙырға керешә.* С. Агиш. *Ғата Сөләймәнов халыҡ араһында йөрөгән көйҙәрҙе йыйып, .. бай репертуар туплаған.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 16 март.

**РЕПЕТИ́ТОР** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Өҫтәмә дәрес менән ниндәйҙер курс үтергә, белем үҙләштерергә ярҙам иткән кеше. *Репетитор эше. Репетитор яллау.*

**РЕПЕТИТОРЛЫҠ** *и.* Репетитор эше. *Репетиторлыҡ итеү.*

**РЕПЕТИ́ЦИЯ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Драматик, музыкаль һ. б. әҫәрҙе уйнап, йырлап сығышҡа алдан әҙерләү эше. *Ансамбль репетицияһы. Концерт репетицияһы. Репетиция үткәреү.* ■ *Спектакль ҡуйырға булдылар. .. Пьеса табып, репетиция яһай башланылар.* И. Ғиззәтуллин. **Генераль репетиция** халыҡ алдына сыҡҡанға тиклем үткәрелгән һуңғы репетиция. / *һөйл.* Нимәнелер һынап ҡарап алдан күнегеү эше әҙерлек. *Матчҡа репетиция. Парадҡа репетиция.* ■ *Үҙемде ниндәй яҡшы тоттом! Тулы конспект һәм репетиция менән килгән кеүек, Урманцева менән нисек һөйләштем!* С. Агиш.

**2.** Бер үк нотаны тиҙ-тиҙ ҡабатлауҙан ғибәрәт булған музыкаль фраза. *Ябай репетиция.* **Ҡат наш репетиция** ике һәм унан артыҡ нотаны ҡабатлауҙан торған фраза.

**РЕ́ПЛИКА** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Һөйләшеүселәрҙең береһенең икенсеһенең һүҙенә ҡаршы һүҙе йәки иҫкәртеүе. *Ҡыҫҡа репликалар, диалогтар аша автор космополит пруссак Фольгнерҙың синфи йөҙөн асып бирә алған.* М. Ғималова. / Һөйләнгән телмәр йөкмәткеһе буйынса йәки башҡа хәлгә ҡарата урындан белдерелгән ҡаршылыҡ ҡаршы әйтелгән һүҙ йәки иҫкәртмә. *Быға тиклемге кәңәшмәләрҙә тыныс ҡына ултырған Мәрйәм реплика ла ташлай башланы, күп кенә хәлдәр менән килешмәне.* Р. Низамов.

**2.** *юр.* Суд процесында әйтелгән ҡаршы һүҙ. *Ғәйепләнеүсе репликаһы. Прокурор репликаһы*

**3.** *театр.* Артистың икенсе уйнаған кешегә яуап итеп әйткән һүҙе йәки икенсе кеше һөйләр алдынан әйткән аҙаҡҡы һүҙе. *Драма театры артистары шулай ти: спектаклдең уңышы йәки уңышһыҙлыҡҡа осрауы башлаған артистың иң тәүге репликаны ҡайһылай һәм ниндәй тон менән әйтеүенә бәйләнгән.* Ғ. Әмири.

**4.** *муз.* Музыкаль фразаның башҡа тауыш йәки башҡа тон менән ҡабатланыуы. *Реплика ҡатнаш көй.*

**5.** *сәнг.* Художестволы әҫәрҙең авторҙың үҙе тарафынан эшләнгән күсәрмәһе.

**РЕПОРТАЖ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Авторҙың үҙ күҙе менән күргән көндәлек ваҡиғалар тураһында матбуғат һәм радио өсөн мәғлүмәт туплауы. *Репортаж яҙыу.* ■ *Миңә арыш урган комбайнерҙар тураһында репортаж алып ҡайтырға кәрәк. Редакциянан ашыҡтыралар.* Р. Низамов. / Шул мәғлүмәттәрҙән торған хәбәр. *Репортаж дөрөҫлөгө. Репортаж һүрәте. Репортаж баҫыу. Репортаж тапшырыу.* ■ *Белая Калитвала атаевсыларға обелиск асылыу айҡанлы газеталар күп төрлө репортаждар һәм хәбәрҙәр урынлаштырҙы.* Ә. Ихсан.

**РЕПОРТЁР** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Матбуғат, радио, информация агентлығының көндәлек ваҡиғалар тураһында хәбәр туплап килтерә торған хеҙмәткәре. *Репортёр мәҡәләһе. Репортёр эше.*

**РЕПОРТЁРЛЫҠ** *и.* Репортер эше. *Репортёрлыҡ итеү.*

**РЕПРЕССИВ** [*рус.* репрессивный] *с.* Репрессияға мөнәсәбәтле. *Репрессив политика. Репрессив саралар. Репрессив эш.*

**РЕПРЕССИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Дәүләт органдары тарафынан ҡулланылған яза. *Репрессияға эләгеү. Репрессия яһау.* ■ *1937 йылда шәхес культы бик ныҡ үҫеп киткән заманда башҡорт совет әҙәбиәтенең иң күренекле кадрҙарының ғәйепһеҙ репрессияға эләгеүе йәш әҙәбиәттең үҫеүенә бик ҙур зыян килтерҙе.* Ғ. Рамазанов.

**РЕПРЕССИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **репрессиялау.**

**РЕПРЕССИЯЛАУ** *ҡ.* Репрессия яһау, репрессияға эләктереү.

**РЕПРОДУКТОР** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Радио тапшырыуҙарын ишеттерә торған ҡорамал. *Идара ҡапҡаһының бағанаһына һуғыш ваҡытында уҡ ҡуйылған репродуктор бөтә ауылды яңғыратып һөйләп тора.* Ғ. Ибраһимов.

**РЕПРОДУКЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** *полигр., фото* Полиграфия юлы йәки фотография ысулы менән төшөрөлгән нәмәләрҙең (һүрәт, картина, һыҙманың, баҫма текстың һ. б.) күсермәһен алыу һәм ишәйтеү эше. *Репродукция техникаһы.*

**2.** Баҫма һүрәт, картина йәки фотография. *Иң яҡшы репродукцияға конкурс. Репродукция яһау.* ■ *Уҡыусылар Рус дәүләт музейында булды .. Улар һүрәттәрҙең репродукцияһын түгел, .. оригиналдарын ҡараны.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1965, № 1.

**3.** *биол.* Организмдың үҙенә оҡшаш йән эйәләре тыуҙырыуы һәм ишәйеүе. *Вирустар репродукцияһы. Ҡоштар репродукцияһы.* / Яңынан барлыҡҡа килеү, тыуыу һәләте. *Хәҙер ҡарабойҙай тураһында ныҡ уйларға кәрәк .. Яңы репродукциялар, сорттар табырға ваҡыт инде.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 13 ноябрь.

**РЕПС** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Ваҡ ҡына һырлы тығыҙ туҡыма. // *Репс күлдәк. Репс таҫма.*

**РЕПУТАЦИЯ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Кем йәки нимәнеңдер яҡшынасар яғы тураһындағы дөйөм фекер. *Яҡшы репутация. Насар репутация. Репутацияны төшөрөү.* ■ *[Директор — Шакирга:] Йәш егеттәр кеүек, килде-китте йөрөмәгеҙ инде. Исемегеҙ, дәрәжәгеҙ бар, репутацияғыҙҙы ебәреп ҡуймағыҙ.* Н. Мусин.

**РЕСПИРАТОР** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Тын юлдарын газ йәки саңдан һаҡлай торған фильтрлы битлек. *Кислородлы респиратор. Фильтрлы респиратор. Шланглы респиратор.* // *Респиратор битлек.*

**РЕСПУБЛИКА** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Юғары хөкүмәт органдары билдәле ваҡытҡа һайлап ҡуйыла йәки дөйөм халыҡ вәкилдәре ойошмаһы (парламент) тарафынан тәғәйенләнә торған дәүләт идара формаһы һәм шундай идараһы булған ил. *Социалистик республика. Халыҡ-демократик республика.*

**2.** Советтар Союзы составына ингән Совет социалистик дәүләте. *Союз республикаһы. Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы. Россия Федератив Совет Социалистик республикаһы.*

**3.** Эшмәкәрлеге йәки етәкселеге Советтар Союзы республикаларының береһенең эсендә булған ойошмаларға ҡарата әйтелә. *Идара итеүҙең республика формаһы. Республика байрағы. Республика библиотекаһы. Республика дәүләт нәшриәте. Республика матбуғаты.*

♦ **Совет социалистик республикаһы** дәүләттең политик нигеҙен тәшкил иткән халыҡ депутаттары советы йөҙөндә бөтә власть халыҡ ҡулында булған дәүләт идара формаһы.

**РЕСПУБЛИКАН** [*рус.* республиканский] *с.* Республика яҡлы. *Республикан буржуазия. Республикан партия.* // *Республикандар хәрәкәте. Республикандар платформаһы.*

**РЕССОР** [*рус.* рессора ⟨ *фр.*] *и.* Йөрөгәндә һиңкетмәһен, һикертмәһен өсөн күсәр өҫтөнә ҡуйылған һығылмалы тимер. *Гидравлик рессор. Пружиналы рессор.* ■ *Һуңғы ваҡытта Ғәлиҙең бөтә вазифаһы .. арбаны ваҡытында майлау, рессорҙарын ҡарап йөрөү, кәрәк һайын тракторҙан ыскындырыу ине.* Ғ. Лоҡманов.

**РЕССОРЛЫ** *с.* Рессор ҡуйылған. *Рессорлы арба.* ■ *Йомшаҡ рессорлы ҡырандас йышырах бәүелтә, тимерле ныҡ тәгәрмәстәр күңеллерәк келтерәшә башланы.* Ф. Иҫәнғолов.

**РЕСТАВРАТОР** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Сәнғәт әҫәрҙәренә, боронғо ҡомартҡыларға реставрация (1 мәғ.) яһаған белгес. *Реставрация эше.*

**2.** Реставрация (2 мәғ.) яҡлы кеше; ҡолатылған политик ҡоролошто кире ҡайтарырға тырышҡан кеше. *Капитализм реставраторҙары.*

**РЕСТАВРАТОРЛЫҠ** *и.* Реставратор (1 мәғ.) эше. *Реставраторлыҡ менән шөғөлләнеү.*

**РЕСТАВРАЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Боҙолған, иҫкергән, туҙған сәнғәт әҫәрҙәренең, боронғо ҡомартҡыларҙың элекке хәленә ҡайтарылыуы. *Ғилми реставрация. Реставрация методикаһы.*

*Реставрация методы. Реставрация эштәре. Картинаға реставрация яһау. Реставрацияға биреү.*

**2.** Элек булып, ҡолатылған политик ҡоролоштоң кире ҡайтарылыуы.

**РЕСТАВРАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **реставрациялау.** *Реставрацияланған картина.*

**РЕСТАВРАЦИЯЛАУ** *к.* **1.** Реставрация (1 мәғ.) яһау; иҫкене, боҙолғанды һ. б. кире элекке хәленә ҡайтарыу. *Картинаны реставрациялау. Деталдәрҙе реставрациялау.*

**2.** Ҡоролошҡа реставрация (2 мәғ.) яһау: иҫке ҡоролошҡа кире ҡайтыу.

**РЕСТОРА́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ҡиммәтле ашамлыҡ-эсемлек алып, иркенләп ултыра торған ашхана һәм шул ашхана урынлашҡан бина. *Класслы ресторан. Ресторан ашы. Станция рестораны. Ресторанда ашау. // Ресторан вагон.* ■ *Ҡыҫҡырышып йырлашып, ресторандарҙың эсен дер һелкетеүҙәр бар ине.* Ш. Бабич.

**РЕСУ́РС** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** *гәҙәттә күпл.* Кәрәк саҡта файҙаланыр өсөн ҡулда тотолған төрлө һаҡлыҡ нәмә, аҡса һ. б. *Материаль ресурстар. Тәбиғәт ресурстары. Финанс ресурстары. Хеҙмәт ресурстары. Экономик ресурс. Энергия ресурстары.* ■ *Беҙҙә нефть менән тәбиғи газ ресурстары иҫ киткес ҙур.* Д. Бураҡаев. *Беҙҙең алда тәбиғәтте һаҡлау һәм уның ресурстарын рациональ файҙаланыу бурысы ҡырҡыу тора.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.

**2.** *тех.* Машинаның эшләр мөмкинлеген билдәләгән ваҡыт дауамы (техник паспортта күрһәтелә). *Двигателдең ресурсы. Станоктың ресурсын күтәреү.*

**РЕТРАНСЛЯ́ТОР** [*рус.*] *и. махс.* Радио элемтәһе линияһында ике аралағы пункт итеп файҙалана торған ҡоролма, яһалма мөхит йәки күк есеме. *Телевидение ретрансляторы. Ретранслятор спутник.*

**РЕТРАНСЛЯЦИОН** [*рус.* ретрансляционный] *с.* Ретрансляцияға мөнәсәбәтле.

**РЕТРАНСЛЯ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. радио, теле* Радиостанцияның йәки телевидение үҙәгенең эш радиусын арттырыу өсөн радиотрансляторҙар ярҙамында радио сигналдарының, радио һәм телевидение программаларының ҡабул ителеүе һәм артабан боҙмай тапшырылыуы. *Ретрансляция станцияһы. Ретрансляция яһау.*

**РЕТРАНСЛЯЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **ретрансляциялау.** *Ретрансляцияланған тапшырыу.*

**РЕТРАНСЛЯЦИЯЛАУ** *к.* Ретрансляция яһау. *Радио сигналдарын ретрансляциялау. Телевидение тапшырыуын ретрансляциялау.*

**РЕТУШЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **ретушлау.** *Ретушланған картина. Һүрәт насар ретушланған.*

**РЕТУШЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **ретушлау.** *Картинаны ретушлатыу. Һүрәтте ретушлатып алыу.*

**РЕТУШЛАУ** *к.* Ретушь юлы менән эшкәртеү, төҙәтеү. *Негативты ретушлау. Ретушлап сығыу.*

**РЕТУШСЫ** *и.* Ретушь юлы менән эшкәртеүсе, төҙәтеүсе белгес.

**РЕ́ТУШЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ҡағыҙға баҫҡан ваҡытта карточкалағы һүрәтте, өҫтәп эшләп, буяп йәки химик эшкәртеп, килеп етмәгән урындарын төҙәтеү эше, шулай уҡ гравюра таҡтаһының юйылған урындарының яңынан ҡайтарылыуы. *Ретушь юлы менән эшкәртеү.*

**РЕФА́КЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. сауҙа.* Алыш-биреш ваҡытында хаҡтың тауар юғалыу, боҙолоу, сифаты ҡаралғандан түбән булыу һ. б. иҫәбенә кәметелеүе. *Рефакция яһау.*

**РЕФЕРА́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ғилми хеҙмәттең, китаптың һ. б. ҡыҫҡа йөкмәткеһен һөйләп йәки яҙып бирелгән эш. *Рефераттар журналы. Ғилми реферат яҙыу.*

**2.** Әҙәби һәм башҡа сығанаҡтарҙы күҙәтеүгә нигеҙләнеп яҙылған ҡыҫҡа сығыш. *Реферат уҡыу. Башҡорт әҙәбиәтенең һуңғы осорона реферат яҙҙы.*

**РЕФЕРЕ́НДУМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Мөһим дәүләт мәсьәләһен хәл иткәндә халыҡ фекерен белеү өсөн ил күләмендә үткәрелгән һорау. *Закон сығарыусы референдум. Конституцион референдум.*

**РЕФЕРЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Реферат менән сығыш яһаған, реферат уҡыған кеше. *Референт үҙенең рефератын аудиторияға һөйләп сыҡты.*

**2.** Айырым мәсьәләләр буйынса кәңәш биргән, сығыштар әҙерләгән вазифалы кеше.

**3.** Ғилми ойошмаларҙа директор секретары.

**РЕФЛЕ́КС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. физиол.* Тере организмдың тышҡы тәьҫиргә үҙәк нервы системаһы ҡатнашлығында яһаған яуап реакцияһы. *Вегетатив рефлекс. Тукланыу рефлексы. Хәрәкәт рефлексы. Һаҡлау рефлексы.* **Шартлы рефлекс** юғары тереклек организмының ғүмере эсендә мотлаҡ баш мейеһенең ҙур ярым шарҙары ҡабығы ҡатнашлығында барлыҡҡа килгән рефлекс. **Шартһыҙ рефлекс** тыумыштан килеп, нәҫелдән нәҫелгә тапшырылған рефлекс.

**РЕФЛЕ́КСИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* Шикләнеүҙәр, икеләнеүҙәр тулы уй-фекер һәм үҙ кисерештәреңә анализ яһарға һәүәҫлек. *Лирик кисерешкә, шәхси тәжрибәгә нигеҙләнмәгән публицистика күбеһенсә риторикаға алып барһа, граждан лыҡ рухынан ситләшкән лирика, үҙе лә һиҙмәҫтән, рефлексияға ауыша.* Ә. Хәкимов.

**РЕФЛЕКСЛЫ** *с.* Ихтыярҙан тыш, аңһыҙ рәүештәге. *Рефлекслы бәйләнеш. Рефлекслы хәрәкәт.*

**РЕФЛЕКТИВ** [*рус.* рефлективный] *с. кит. кар.* **рефлекслы.** *Рефлектив хәрәкәт.*

**РЕФЛЕ́КТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Яҡтылыҡ сығанағынан сыҡҡан нурҙарҙы сағылдыра торған ҡорамал. *Фараның рефлекторы. Шәмгә рефлектор ҡуйыу.*

**2.** Лампочка менән ҡайтарғыстан торған йылытҡыс ҡорамал. *Рефлекторҙар быҙау аҙбарына ла ҡуйылды.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 11 август.

**3.** Күк есемдәренең һүрәтен күрһәткән төрлө көҙгөлө телескоп.

**РЕФЛЕКТО́Р** *с.* **1.** Рефлекс (1 мәғ.) тәьҫирендә тыуған; рефлекс сәбәп булған. *Нервы системаһының рефлектор эшмәкәрлеге. Организмдың рефлектор эшмәкәрлеге.* ■ *Массажсы массаж яһағанда нервы остарына тәьҫир итә, һәм организмда рефлектор реакция барлыҡҡа килә.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 7 ғинуар.

**2.** *кар.* **рефлекслы.**

**РЕФЛЕКТОРЛЫ** *с.* Рефлекторы булған, рефлектор ҡуйған. *Рефлекторлы көҙгө. Рефлекторлы лампа.*

**РЕФО́РМА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ниҙеңдер үҙгәртеп ҡоролоуы, яңыртылыуы. *Акса реформаһы. Яҙыу реформаһы. Мәктәп реформаһы. Экономик реформа. Реформа үткәреү.*

**2.** Дәүләт ҡоролошон нигеҙенән үҙгәртмәгән политик сара. *Аграр реформа. Реформа яһау.* ■ *Әгәр ҙә беҙ .. үҙ-ара аңлашып берләшһәк, бик ҙур реформалар яһап, мәҙәни тормошка күсә-сәкбеҙ.* Һ. Дәүләтшина. *Балаларҙы тормошка әҙерләү — мәктәп реформаһының талабы.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 28 ғинуар.

**РЕФОРМАЛАУ** *к.* Реформа яһау; реформа үткәреү. *Халыҡ мәғарифын реформалау. Юғары мәктәпте реформалау.*

**РЕФОРМА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Берәй өлкәлә реформа үткәргән эшмәкәр; үҙгәртеп ҡороусы.

**РЕФОРМА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* 16 быуатта Европала католик сиркәүенә һәм папа власына ҡаршы дини көрәш формаһын алған феодализмға ҡаршы социаль-политик хәрәкәт.

**РЕФОРМИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Эшселәр хәрәкәтендә революцион синфи көрәште, социалистик революцияны һәм пролетариат диктатураһын кире ҡағып, синыфтар хеҙмәттәшлегенә саҡырып, капитализмдың нигеҙенә ҡағылмаған реформалар ярҙамында уны «ғөмүми бәхет» йәмғиәте итергә тырышҡан политик ағым. *Буржуаз реформизм.*

**РЕФОРМИ́СТ** [*рус.*] *и.* Реформизм яҡлы кеше. *Зөфәр .. реформистарҙың батшаға ла ярай, баярҙар, фабриканттар күңелен дә күреп, әле революцион көрәш алып барған эшселәрҙең, крәҫтиәндәрҙең мәнфәғәттәрен бөтөнләй юҡҡа сығарырға тырышҡан аумаҡай вәкилдәр икәнен һөйләп бирҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**РЕФОРМИСТИК** *с.* Реформизмға мөнәсәбәтле. *Реформистик позиция. Реформистик программа.*

**РЕФРЕ́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. әҙ., муз.* Шиғыр йәки йырҙың билдәле бер тәртиптә ҡабатланып килгән өлөшө. *Шиғыр рефрены.*

**РЕФРИЖЕРА́ТОР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Тиҙ боҙола торған аҙыҡ-түлекте ташыу өсөн һыуытҡыс ҡоролмалар менән йыһазланған карап, вагон, машина һ. б.

**РЕЦЕНЗЕ́НТ** [*рус.*] *и.* Рецензия яҙған кеше, рецензия авторы. *Китаптың рецензенты. Театр рецензенты.* ■ *Рецензент кульъяҙманы уҡыған-уҡыған, һыҙған-һыҙған да байтаҡ өлөшөн уҡымайынса ла киткән.* Ғ. Ғәйнуллин.

**РЕЦЕ́НЗИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ғилми хеҙмәткә, художестволы әҫәргә һ. б., спектаклгә, концертҡа, кинофильмға тәнҡит күҙлегенән баһа биреп яҙылған мәҡәлә. *Китапҡа рецензия. Музыкаға рецензия. Театр рецензияһы. Рецензияға биреү. Рецензия яҙыу.* ■ *Китапҡа яҙылған рецензияларҙа гәҙиттә әҫәрҙең йөкмәткеһе тураһында, формаһына ҡағылмайынса ғына, фекер алып барыла.* Ғ. Хөсәйенов. Эске **рецензия** ҡулъяҙмаға редакция, нәшриәт һ. б. ҡушыуы буйынса яҙылған, баҫып сығарыуҙы күҙ уңында тотмаған рецензия. **Тышҡы рецензия** эштең йөкмәткеһен дөрөҫләтеү, кире ҡағыу һ. б. маҡсатта ошо йүнәлештә эшләгән башҡа ойошма, белгес тарафынан яҙылған рецензия.

**РЕЦЕНЗИЯЛАУ** *к.* Нимәгәлер рецензия яҙыу; нимәгәлер баһа биреү. *Китапты рецензиялау.*

**РЕЦЕ́ПТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Врачтың аптекаға дарыуҙың исемен, нисек әҙерләргә икәнен, ауырыған кешегә уны нисек ҡулланырға кәрәклеген күрһәтеп биргән яҙыуы. *Рецепт менән дарыу алыу.*

**2.** Нимәнелер әҙерләү, эшләү буйынса күрһәтмә. *Быяла ҡайнатыу рецепты. Пиво әсетеү рецепты.* ■ *Фабрика лабораторияһында яҙылған рецепт буйынса химик материал эшләйҙәр.* Ә. Ихсан.

**РЕЦЕПТА́Р** [*рус.*] *и.* Врач биргән рецепт буйынса аптекала дарыу әҙерләргә заказ алған хеҙмәткәр. *Рецептар эше. Рецептарға заказ биреү.*

**РЕЦЕ́ПТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. физиол.* Тышҡы тәьҫирҙе һиҙә торған нервы осо. *Тышҡы рецептор. Эске рецептор. Ишетеү рецепторы. Күреү рецепторы.*

**РЕЦЕПТУ́РА** [*рус.*] *и. фарм., мед.* Дарыу яҙыу һәм әҙерләү ҡағиҙәләре йыйылмаһы. *Рецептура бланкы.* / Ниҙер әҙерләү, бешереү тураһындағы мәғлүмәттәр. *Ашлама рецептураһы. Рецептура белешмәһе.*

**РЕЦИДИ́В** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *мед.* Бөтөнләй бөттө тип уйлаған ауырыуҙың яңынан ҡабатланыуы, ҡуҙғыуы. *Гастриттың рецидивы.*

**2.** *юр.* Бер тапҡыр хөкөмгә тарттырылған кешенең ҡабаттан енәйәт ҡылыуы.

**РЕЦИДИВИ́СТ** [*рус.*] *и.* Яңынан енәйәт ҡылған кеше. *Үтә куркыныслы рецидивист.* ■ *Енәйәтте .. касандыр хөкөм ителгән бер рецидивист ойоштороан.* Х. Зарипов.

**РЕЧИТАТИ́В** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и. муз.* Телмәр интонацияһы менән ритмикаһын йырҙа ҡушып биргән вокаль форма (күберәк операла була). *Опералағы вокаль партияларҙа моңло, киң һулышлы көйҙәр менән бер рәттән речитатив та ҙур урын биләй.* З. Исмәғилов.

**РИАЗИ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Математик.

**РИАЗИАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Математика.

**РИ́ГА** [*рус.*] *и.* Башы ҡыйыҡлап ябылған көлтә киптерә һәм һуға торған урын; ҡыйыҡлы ырҙын.

**РИҒӘЙӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Иғтибарлыҡ, хәстәрлек. *Мин былярҙың [эшселәрҙең] ҡайһы берҙәре менән үҙләшеп киттем. Үҙҙәре лә мине яҡын күрә, уңған шәкерт, тип риғәйә күрһәткән булалар ине.* М. Ғафури.

**2.** Ололоҡ, дан; хөрмәт. *Үҙ риғәйәһе менән үйнаған, үҙ ҡул аҫтындағыға золомлоҡ ҡылған йорт уңмаҫ булыр.* «Батыршаның хаты».

□ **Риғәйә итеү** (*йәки* **ҡылыу**) **1)** иғтибарға алыу. *Байҙарҙан мазлум хаҡын риғәйә ҡылған юҡ тип иғтикад ҡылып йөрөһәм дә, был байҙан шундай шәфҡәтле һүҙҙәр ишеткәнем өсөн бай әфәндегә меңдәрсә тәшәккер әйттем.* З. Өммәти; 2) хөрмәт итеү, хөрмәтләү; ололау. *Әсәйем Нурислам ағайҙы бик риғәйә итә, ярата, уны Мәһәҙи ағайҙан алдан күрә ине.* М. Ғафури.

**РИҒӘЙӘТ** [*ғәр.*] *и. кар.* **риғәйә.**

**РИДИКЮЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың ваҡ-төйәк һалып йөрөтә торған бәләкәй ҡул сумкаһы. *Гөлнар .. оҙаҡ ҡына эҙләп, ридикюленән ҡулъяулығын сығарҙы ла, битен-күҙен һөрттө.* Ғ. Ғүмәр.

**РИҘУАН** [*рус.* рыдван] *и.* Бесән, көлтә ташый торған бейек үрәсәле арба; көлә арбаһы; келәймәк. *Был арба түшен улай ятҡырып серетергә ярамай, фермаға бесән ташый торған риҙуанға алмаштырып ҡуйырға кәрәк.* Б. Бикбай.

**РИЖАЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ир кешеләр, ирҙәр. *Рижалыны ҡырып һалмыш, ҡатындарын әсир алмыш.* Ғ. Соҡорой.

**РИЗА** [*ғәр.*] *с.* **1.** Ниндәйҙер һүҙгә, тәҡдимгә, шартҡа ыңғай, ҡаршылыҡһыҙ. *Һәр әйткәнгә риза кеше. Барырға риза.* ■ *Минең ситкә китеп уҡыуыма әсәйем риза булһа ла, атайым бик үк күнеп етмәне.* Т. Йәнәби.

**2.** Кемдән йәки ниҙән дә булһа ҡәнәғәт. *Тормоштан риза кеше. Эштән риза кеше. Үҙенән-үҙе риза. Риза булыу. Риза иттереү.* ■ *Минең Наиләм минән бик риза.* С. Агиш. *[Өйрәнсек] үҙ эшенән сикһеҙ риза булып йәшәй биргән.* З. Биишева.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**РИЗАЛАНДЫРЫУ** *к. ҡар.* **ризалатыу.** *[Ҡатын:] Ирем икенсе мине туҡмамаҫҡа һүҙ бирһә, мулланы ризаландырам тиһә, уға теймәгеҙ* (Әкиәттән).

**РИЗАЛАТЫУ** *к.* **1.** Ниндәйҙер һүҙгә, тәҡдимгә, шартҡа ыңғайлатыу; риза итеү, күндереү. *[Фәрхәт:] Күптәргә ул урын эләкмәне. Председателде саҡ ризалаттым.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Ни менәндер ҡәнәғәт итеү, ҡәнәғәтләндереү, риза иттереү. *Ризалатып ҡуйыу.* ■ *Ашап бөткәс, хужаны ни менән ризалатыу тураһында кәңәш итә башланыҡ — бер пар һалдат ҡулдәк-ыштаны, бер .. гимнастерка бирергә булдыҡ.* Д. Юлтый.

**РИЗАЛАУ** *к.* Ҡәнәғәтләндереү, ризалатыу, риза итеү. *[Бикйән — Йәрешкә:] Һаҙағыңды юғалттым, ағай. Аткан ерҙән эҙләп ҡараным, таба алманым. Үпкәләмә инде, ҡасан булһа ла бер ризалармын* (Әкиәттән).

**РИЗАЛАШТЫРЫУ** *к.* Риза (1 мәғ.) итеү, күндереү. *Баш ҡоҙа йөрөтөп эш сыҡмағас, батша үҙе килеп, картты ҡыҙын бирергә ризалаштыра* (Әкиәттән).

**РИЗАЛАШЫУ** *к.* Риза (1 мәғ.) булыу, килешеү, күнеү. *Ҡыҙ баяр менән ризалашып, вәғәҙә бирешеп, уның йортонда йәшәй башланы.* М. Тажи.

**РИЗАЛЫҠ** *и.* **1.** Ниндәйҙер һүҙгә, тәҡдимгә, шартҡа ҡарата булған ыңғай мөнәсәбәт. *Ризалыҡ алыу. Ризалыҡ белдереү.* ■ *Мин баш һелкеп кенә ризалыҡ биргән булдым.* Д. Юлтый. *[Әхмәҙи:] Уның был кешегә барырға бер ҙә ризалығы юҡ, ти еңгәләре.* Һ. Дәүләтшина. / Риза (1 мәғ.) булып бирелгән рөхсәт; фатиха. *Ризалыҡ һорау.* ■ *Ата-әсәһе ризалыҡ биргән. Шунан бик һәйбәтләп туй яһап, ҡыҙҙы оҙатҡандар* (Әкиәттән).

**2.** Кемдән йәки ниҙәндер риза (2 мәғ.), ҡәнәғәт булыу хисе; ҡәнәғәтлек. *Ҡоҙаларға мәңге ризалығым юҡ, һүҙемде йыҡтылар.* Һ. Дәүләтшина. *Уның [Ғамирҙың] был һүҙҙәрендә .. үҙенең әҙәм араһына инеп, һанға алыныуына ризалыҡ та бар ине.* Б. Бикбай.

**РИЗАЛЫҠҺЫҘ** *р.* Риза (1 мәғ.) булмайынса, булмай тороп. *Ата-әсәнән ризалыҡһыҙ сығып китеү.* ■ *Әгәр ҙә беҙҙән ризалыҡһыҙ ҡыҙымды алып ҡасып китәләр икән, абай булһындар — ун дуғалы ҡоҙа менән баҫып барып ҡалым алырбыҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**РИЗАҺЫҘ** *с.* Риза (2 мәғ.) булмаған. *Ризаһыҙ төҫ. // Ризаһыҙ ҡарау.* ■ *Һәр кем эшләр белгәнсә, ҡул көсөнән килгәнсә, тапҡан табыш һәр кемгә бүленер ҡарап эш көнгә — күркә ризаһыҙ ҡалды һәм тиҙ генә шылтайҙы.* Ғ. Амантай.

**РИЗАҺЫҘЛЫҠ** *и.* **1.** Ниндәйҙер һүҙгә, тәҡдимгә, шартҡа ҡарата булған кире мөнәсәбәт. *Ризаһыҙлыҡ белдереү.* ■ *Ғүмәр ризаһыҙлыҡ менән ситкә китте: — Юҡ инде, илле тингә уны ҡарарға барғансы, мин музейға барам.* С. Агиш.

**2.** Кемдән йәки ниҙәндер риза (2 мәғ.), ҡәнәғәт булмау хисе; ҡәнәғәтһеҙлек. *Бөтә ерҙә — ҡаршылыҡ, мужиктарҙың ризаһыҙлығы. Ҡоралды күтәрелешкә тиклем еткән өлкәләр ҙә бар, имеш.* Б. Бикбай.

**РИЗЫҠ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ислам диненсә, алланың бәндәгә алдан, тыумаҫ борон билдәләп ҡуйған аҙығы. *Яҙған ризыҡ. Ризыҡ менән тыуыу.* **Ризыҡ бөтөү** кешегә ғүмерендә яҙған аҙыҡ бөтөп, үлер көн килеү. *Туҡта, Ҡуҙыйкүрпәс! Атайыңды ҡалапан эҙләмә,— ти Әүлиә.— Уның ризығы бөтөп, әжәле килеп етте инде.* «Ҡуҙыйкүрпәс». **Ризыҡҡа яҙыу** билдәле бер аҙыҡ кемгәлер булыу, яҙыу. *[Муйылбикә — ҡыҙына:] Эйе, алла бәрәкәтен биреп, .. ризыҡҡа ғына яҙһын инде, балам.* Һ. Дәүләтшина. **Ризыҡ сәселеү** кемгәлер яҙған ризыҡ төрлө ергә таралыу (ситтә йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә; йәнәһе, уны ризығы тарта). *[Рәхимә:] Ризығы ситкә сәселгәс, йөрөгәндер шул инде. Ҡайҙа ни ашарға .. хоҙай маңлайына яҙған булһа, бәндә шунда бит.* Һ. Дәүләтшина. **Ризыҡ тартыу** (*йәки* **яҙыу**) кешене үҙенә яҙған ризығы йөрөтөү. *Ризыҡ яҙған ергә ирҙәр бара, тарихтарға һыймаҫ дан ҡала* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ашай торған аш, ашамлыҡ; аҙыҡ. *Ризыҡ бөткән саҡ. Тәғәм ризыҡ юҡ. Хәләл ризыҡ. Ризыҡ ҡабыу. Ризыҡтан өҙөү. Ризыҡтан яҙыу. Ризыҡты ауыҙҙан тартып алыу. Ризыҡты киҫеү.* ■ *Әсә әйткән: «Балам, был өшәне үҙ һөтөмә баҫып бешерҙем. Татлы ризыҡ булһын йөрәгеңә, башҡа бер нәмәм юҡ, кисер һин!»* Б. Вәлит. *Ҡош атты батыр егет бик күп итеп, алып ҡайтты әсәһенә ризыҡ итеп* (Әкиәттән).

● *Бала үҙ ризығы менән тыуа.* Әйтем.

**РИЗЫҠЛАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Ризыҡлы, аҙыҡлы итеү; ризыҡ (2 мәғ.) биреү. *Һин беҙҙе ризыҡландыр. Ризығыбыҙ — икмәк-нандыр, ҡатыҡ, һөт, май һәм балдыр, яу, яу, ямғыр, яу, ямғыр!* Ш. Бабич.

**2.** Ашатыу, эсереү, туҡландырыу. *Ерҙә бөтә йән эйәһен ризыҡландырған әсә тип ҡарайҙар.* Ә. Вәли.

**РИЗЫҠЛАНЫУ** *к.* **1.** Ризыҡлы, аҙыҡлы булыу; ризыҡ (2 мәғ.] инеү, ҡулға төшөү. *Уралсылар кейек аулағандар, бит улар ҙа һөнәр бел-*

*гәндәр, малдар эйәләтеп, ризыкланып, үҙҙәрен-сә йәшәй биргәндәр.* Б. Вәлит.

**2.** Ашау, эсеү, туҡланыу. *Кеше ваҡытында тамаҡ туйҙырмаһа, йә тәүлегенә бер генә ризыкланып йөрөһә, хәлһеҙләнә, сирләй башлай.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 17 июнь. / Тамаҡ туйҙырып, йәшәү. *[Ат — егеткә:] Һин алырға барған алма тирәләй алты башлы аждаһа ята. Бына шул аждаһаның ауыҙына алмалар бешеп төшөп тора, ул шуның менән ризыкланып ята* (Әкиәттән).

**РИЗЫҠ-НӘФӘКӘ** [*ғәр.*] *и. йыйн. иҫк.* Ашар аҙыҡ, аҙыҡ-түлек. *Ризыҡ-нәфәкәһен тейәп килгән.*

**РИКОШЁТ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Ниндәй ҙә булһа ҡаты нәмәнең берәй яҫылыҡҡа тейеп, ҡаҡлыҡ-ҡандан һуң ҙур булмаған мөйөш яһап осоуы. *Рикошет биреп осоу.*

**РИКША** [*рус.* 〈 *яп.*] *и.* **1.** Көньяҡ һәм Көнсығыш Азияла: ике тәгәрмәсле еңел арбаға егелеп, кеше йөрөткән һәм йөк ташыған кеше. *Калькуттала иң эсте өҙгәне — рикшалар .. Ҡартымы, йәшеме — арбаға егелгән дә, кеше ултыртып, урам буйлап йүгерә.* Н. Нәжми.

**2.** Кеше егелеп йөрөткән ике тәгәрмәсле арба. *Китаптың титул битенә рикшаға ултырған эфәнде һүрәтен төшөрөү йыйынтыҡтың [Лу Синь хикәйәләренең] йөкмәткеһен бер нисек тә билдәләй алмай.* Ғ. Әхмәтшин.

**РИНГ** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и. спорт.* Бокс ярышы үткәрә торған майҙан. *Рингҡа сығыу.* ■ *Бына аркан аҫтынан рингҡа ике яҡтан ике һылыу егет килеп инде һәм икеһе ике мөйөшкә барып баҫты.* Р. Ғабдрахманов.

**РИСАЛӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Пәйғәмбәр илселеге, пәйғәмбәрлек.

**РИСТАН** [*рус.* арестант] *и.* **1.** *һөйл. кар.* **тоткон 2.** *Ристандар төркөмө.*

**2.** Әрләгәндә әйтелә. *[Бохайыр:] Ябай атлы ҡаҙаҡ! Әммә ул, суҡынсыҡ, ристан, үҙен Петр батша тип атаған.* Б. Бикбай.

**РИСУАЙ** [*фарс.*] *с.* Мәсхәрәләнгән, хур ителгән. *Рисуай әҙәм. // Рисуайға ҡалыу.* ■ *[Күсәрбаев:] Ну, фашист, әҙәм рисуайы яһап ҡалдың ҡалыуын, бынан аҙаҡ мин һинең менән нисек ҡыланырға белермен.* Д. Исламов.

□ **Рисуай булыу** мәсхәрәгә ҡалыу, хур булыу. *Кәрим байҙың улы харап итте, рисуай булды һинең Нәгимәң!* Ғ. Ғүмәр. **Рисуай итеү** мәсхәрәгә ҡалдырыу, хур итеү. *[Ологатай:] Ҡарт көнөмдә битемә ҡара яҡты, мир алдында рисуай итте бәдбәхет ҡыҙыҡай.* Н. Иҙелбай.

**РИСУАЙЛЫҠ** *и.* Мәсхәрә хәл, хурлыҡ. *Рисуайлыҡ ҡылыу. Ғүмере рисуайлыҡта үтте.*

**РИСӘЛӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Яҙылған хат, хәбәр, мәҡәлә, хеҙмәт. *Рисәлә яҙыу. Рисәлә төҙөү.* ■ *Әхмәт Исхаки, һин бик илтифатһыҙһың, бугай: мин һораҡан өс рисәлә әле лә юҡ — үтте ай.* Ш. Бабич. / Бәләкәй китап; брошюра.

**РИТМ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Хәрәкәттең, өн-тауыштың һ. б. тигеҙ аралыҡта, билдәле тәртиптә сиратлашыуы. *Йөрәк ритмы. Йыр ритмы. Шиғыр ритмы.* ■ *Сапҡыс машинаның тигеҙ ритм менән тырылдауы салғы сыжлауҙарын күмеп, алыҫҡа таралды.* Ф. Лоҡманов. *Таҡмаҡтың .. строфаһы, ҡыҫҡа йырҙағы кеүек, минималь ижекле дүрт юлдан тора, ләкин бында ритм айырыуса асыҡ.* Ә. Харисов. / Ниҙеңдер бер ыңғай, бер тиҙлек менән барышы. *Хеҙмәт ритмы. Эштә ритм һаҡлау.*

**РИТМИК** *с.* **1.** Билдәле бер ритмда барған, ритмға буйһонған. *Ритмик тауыш. Романдың ритмик төҙөлөшө.* ■ *Бейеү көйҙәренең ритмик көсө хатта аҡ һаҡаллы ҡарттарҙың да йөрәген елкетә.* Б. Бикбай.

**2.** Ритмикаға мөнәсәбәтле. **Ритмик гимнастика** гимнастиканың ритм тойғоһон үҫтергән, фәҡәт ритмлы хәрәкәткә ҡоролған музыка аҫтында ғына башҡарылған бер төрө.

♦ **Ритмик бейеү** бейеүҙең башҡа элементтарына ҡарағанда ритм өҫтөнлөк иткән төрө.

**РИТМИКА** [*рус.*] *и.* **1.** Ритмдар системаһы һәм уға хас тәбиғәт. *Шиғыр ритмикаһы.* ■ *Ритмикаһының тигеҙ үлсәүле һәм шыма булыуы, юлдар рифмалашыуының мәжбүри һәм ныҡлы ҡағиҙәгә нигеҙләнеүе ҡобайырҙың уҡылыу (әйтелеү) еңеллеген тәьмин итә.* Ә. Харисов.

**2.** Шиғырҙағы, музыкалағы, бейеүҙәге һ. б. ритм тураһындағы фән.

**3.** Ритмды тойоу һәләтлеге тәрбиәләй торған физик күнекмәләр системаһы. *Ритмика дәресе. Ритмикаға өйрәтеү.*

**РИТМЛЫ** *с.* **1.** Бер ритмға ҡоролған. *Ритмлы тирбәлеш. Ритмлы хәрәкәт. Ритмлы шиғыр.*

**2.** Бер ыңғайға, бер яйға һалынған; көйлө. *Ритмлы эш.*

**РИТОРИК** *с.* **1.** Риторика ҡағиҙәләренә нигеҙләнгән. *Нәфис һүҙ һөйләү, риторик телмәр Римда киң урын алып, үҫеп китә.* З. Иғдәүләтов.

**2.** Артыҡ күтәренке, ҡабартылған һүҙ ҡулланыу менән айырылып торған. *Риторик телмәр. Риторик тост. Риторик фраза.*

♦ **Риторик һорау** оратор телмәрендәге алым: һорау формаһында әйтелгән раҫлау.

**РИТО́РИКА** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** Нәфис һүҙ теорияһы; һүҙ оҫталығы тураһындағы фән.

**2.** Телмәрҙәге самаһыҙ күтәренкелек, ҡабартылған һүҙҙәр ҡулланыу күренеше. *Абстракт риторика. Ҡоро риторика.* ■ *Агитацион характерҙағы декламация риториканан ғына торорға тейеш түгел.* Ғ. Хөсәйенов.

**РИТУА́Л** [*рус.* 〈 *лат.*] *и. кит. кар.* **йола.** *Дини ритуал. Мәжүси ритуал.* ■ *Сеңләүҙең функцияһы һәм йөкмәткеһе туранан-тура туй ритуалына бәйләнгән.* Ә. Харисов.

**РИҮӘЙӘТ** [*ғәр.*] *и.* Үткән ваҡиғалар тураһында хикәйәләгән һүҙ; хикәйәт. *Дини риүәйәт.* ■ *Урал арҡаһынан ҙур йылғаларға, осрамай үткән был боронғо юл .. хаҡында Кинйә бик күптәрҙән ҡыҙыҡ-ҡыҙыҡ риүәйәттәр ишеткәне бар.* Ғ. Ибраһимов.

□ **Риүәйәт итеү** хикәйәләп һөйләү. *Ҡоролтай Өфөгә 40 саҡырым Ҡалмыш йылғаһы буйында Урҙа тигән ерҙә булғанлығы риүәйәт ителә* (Хикәйәттән).

**РИФ** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Ҡараптар өсөн хәүеф тыуҙырған диңгеҙ төбөндәге йәки диңгеҙ өҫтөнә саҡ ҡына сығып торған ҡаялар теҙеме. *Мәрйен рифтары.* ■ *Бик боронғо дәүерҙә Пермь рифтары Уралдың көнбайыш итәге буйлап төньяҡтан*

*көньякка табан ике мең километрға һуҙылған булған.* Д. Бураҡаев.

**РИ́ФМА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Шиғырҙағы юл аҙағының үҙ-ара ауаздашлығы. *Ҡушма рифма. Саф рифма. Теүәл рифма.* ■ *Ун туғыҙ ижекле формала .. рифма өс ижекле булырға тейеш, бағым һуңғы ижеккә төшә.* Й. Гәрәй.

**РИФМАЛАУ** *к.* Рифмаға һалыу, ялғауҙарҙы үҙ-ара ауаздаш итеү. *Дүрт юллы строфала беренсе юл менән өсөнсө, икенсе менән дүртенсе рифмалап яҙған шиғыр, хатта поэмалар бар беҙҙә.* «Ағиҙел», 1961, № 2.

**РИФМАЛАШЫУ** *к.* Рифма тап килеү, ялғауҙар үҙ-ара ауаздаш булыу. *«Булғандар» һүҙендә бағым икенсе ижектә торһа, «күлдарым» һүҙендә ул өсөнсө ижектә. Шуға улар рифмалаша алмай.* Р. Ниғмәти.

**РИФМАЛЫ** *с.* Рифмаға һалынған, ялғауҙар үҙ-ара ауаздаш килгән. *Рифмалы шиғыр.*

**РИФМАҺЫҘ** *с.* Рифма һаҡланмаған, рифмалашып килмәгән.

**РИХЛӘТ** [*ғәр.*]: **рихләт итеү** *иҫк. кит.* 1) урын алмаштырыу, күсеп китеү; 2) *күсм.* донъя ҡуйыу, үлеү.

**РИШҮӘТ** [*ғәр.*] *и.* Үҙ файҙаңа ниҙер эшләтер өсөн вазифалы кешегә биргән аҡса йәки нәмә; бирем. *Ришүәт алыу. Ришүәт биреү.* ■ *[Әһли:] Тик һин бел дә мин бел .. бер күлдәклек тауар бүләк итермен. [Гөлшат:] Комсомол башың менән оялмай ришүәт төртмәксе булаһыңмы әллә?* С. Кулибай.

**РИШҮӘТСЕ** *и.* Ришүәт алған кеше. *Ун ете йыл эсендә Төхфәтулла кантон, ҙур ришүәтсе булараҡ, егерме тапҡыр хөкөмгә тарттырыла, әммә егерменендә лә үҙе ришүәт биреп ҡотолоп ҡала.* Ә. Харисов.

**РИЯЗӘТ** [*ғәр.*]: **риязәт ҡылыу** (*йәки* **сигеү**) *иҫк.* ябығыр өсөн ашауҙан тыйылып ас йөрөү.

**РОБАҒИ** [*ғәр.*] *и.* Дүрт юллы шиғыр (ғәҙәттә, беренсе, икенсе һәм дүртенсе юлдары рифмалашып килә). *Классик робағи.* ■ *Робағи башҡорт шағирҙарының оло быуыны (М. Аҡмулла, М. Өмөтбаев, М. Ғафури һ. б.) ижадында йыш осрай.* К. Әхмәтйәнов.

**РО́БОТ** [*рус.* ⟨ *чех.*] *и.* Ҡатмарлы техник хеҙмәт башҡарғанда кешене алмаштырыр өсөн тәғәйенләнгән автомат. *Атлап йөрөүсе робот. Манипуляторлы робот. Программалы робот.* ■ *Робот ҡулланыу хеҙмәт етештереүсәнлеген кәмендә ике тапҡырға арттырасаҡ.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 28 ғинуар.

**РОГА́ТКА** [*рус.*] *и.* **1.** Күсереп йөрөтөлә торған тағанлы кәртә. *Һәр ике һалдатка сәнскеле тимерсыбыҡтарҙан эшләнгән рогатка күтәрергә куштылар.* Д. Юлтый.

**2.** *иҫк.* Кешене язалау өсөн кейҙерә торған эс яғына оҙон сәнскәкле тимер ҡуйылған муйынса. *Крәҫтиән йомошо менән йөрөүселәрҙе төрмәгә ябалар, бығауҙар менән бәйләп, үңәстәренә рогаткалар кейҙереп, катор хеҙмәтенә ебәрәләр ине.* Ә. Ғафаров.

**3.** *кар.* **сөйөртмәк.** *Рогатканан атыу.*

**РО́ДИЙ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Химик элемент, аҡ алтын металдар төркөмөнә ингән тиҙ генә иреп бармаған ауыр, көмөш һымаҡ ялтыр металл.

**РОДОДЕ́НДРОН** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Арса һымаҡтар ғаиләһенә ингән эре сәскәле тау үҫемлеге (декоратив ағас итеп үҫтерелә). *Һары рододендрон. Кавказ рододендроны.*

**РО́ЗА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *кар.* **гөлйемеш** 1.

**2.** *бот.* Төрлө төҫтәге эре япраҡлы, хуш еҫле сәскәле, сәнскәк һабаҡлы декоратив ҡыуаҡ һәм шуның сәскәһе. *Аҡ роза. Ҡыҙыл роза. Һары роза.* ■ *Йә мин роза гөлө һымаҡ үҫеп ултырһам ине күркәм, ә һин ерҙе нурға күмгән сәскәһе булһаң, иркәм, мөхәббәт тиң булыр ине.* Я. Ҡолмой.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**РОЗЕ́ТКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Яҡтыртыу, йылытыу һ. б. приборҙарын радио йәки электр сымына тоташтыра торған ике тишекле түңәрәк нәмә. *Штепселле розетка. Радио розеткаһы. Электр розеткаһы. Розетка ҡуйыу.*

**2.** Варенье һалып ашай торған бәләкәй генә һауыт. *Розеткаға варенье һалып алыу.*

**3.** Сәскәгә оҡшатып бөрөлгән орден таҫмаһы. *Иванов .. ҡыҙыл ебәк розетка өҫтөнә орден таға торғайны.* Ә. Вәли.

**РОЗМАРИ́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. бот.* **1.** Ирен сәскәләләр ғаиләһенә ингән түңәрәк япраҡлы мәңге йәшел ҡыуаҡ (япрағынан алынған эфир майы медицинала һәм парфюмерияла ҡулланыла). *Аҡ розмарин. Мичурин розмарины.*

**2.** Ҡышҡа алма сорты һәм шул алманың хуш еҫле әскелтем емеше.

**РОКИРО́ВКА** [*рус.* ⟨ *фарс.*] *и.* Шахмат уйнағанда бер үк йөрөштә королдең бер шаҡмаҡ аша ладья янына, ә ладьяның король аша күсереп эргәләш ҡуйылыуы (уйын барышында бер генә тапҡыр һәм арала юл асыҡ булғанда рөхсәт ителә). *Рокировка яһау. Рокировканан яҙыу.*

**РО́ЛИК** [*рус.*] *и.* **1.** Күсереп йөрөтөүгә уңайлы булһын өсөн мебелдең, роялдең һ. б. аяғына ҡуйылған бәләкәй генә тәгәрмәс. *Карауат ролигы. Пианино ролигы.* ■ *Роликтар өҫтөнән утлы тимер йүгерә.* М. Хәйҙәров.

**2.** Электр сымын стенаға, түшәмгә беркетә торған фарфор изолятор. *Ролик ҡағыу.*

**РОЛИКЛЫ** *с.* Ролик ҡуйылған; ролик менән эшләнгән. *Роликлы коньки. Роликлы карауат. Роликлы подшипник. Роликлы транспортёр.*

**РОЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Артист тарафынан сәхнәлә, кинола кәүҙәләндерелгән художестволы образ. *Эпизодик роль. Роль әҙерләү. Роль уйнау. Ролгә инеү.* ■ *Баш ролдәрҙе башҡарған Рәшитова менән Ушанов та матур уйнаны.* Ғ. Минһажев.

**2.** Артистың спектакль барышында һөйләгән бөтә һүҙе. *Төп роль. Ролдәр дәфтәре. Роль ятлау.*

**3.** Кемдер сифатында башҡарылған эш, вазифа. *[Пристав:] Һеҙ, туташ, бөтөнләй үҙ ролегеҙгә инеп, эшкә тотонғанһығыҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Эш-тормоштағы әһәмиәт, урын. *Авангард роль.* ■ *Беҙ батальондың һәм үҙебеҙҙең ролдәребеҙҙе аңланыҡ .. Беҙ бында тәртип һаҡлау өсөн ... ебәрелгәнбеҙ икән.* Д. Юлтый. *Фольклор борон заманда .. хәҙерге яҙма әҙәбиәт ролен уйнаған.* Ғ. Амантай.

**РОЛЬГА́НГ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. тех.* Роликтар (1 мәғ.) менән йөктө күсергән конвейер; роликлы

транспортёр. *Слиткаларҙы махсус рольгангтар күсереп йөрөтә.* М. Хәйҙәров.

**РОМ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Шәкәр ҡамышының һутынан йәки ҡуйы иҙмәһенән әсеткән ҡаты эсемлек.

**РОМА́Н** [1] [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Ҡатмарлы сюжетҡа ҡоролған ҙур күләмле сәсмә әҫәр. *Антик роман. Мажаралы роман. Тарихи роман. Фәнни-фантастик роман. Шиғыр менән яҙылған роман. Роман яҙыу.* ■ *Тормош ҡатлаулыраҡ романдарҙан, кешеләр ҙә унда төрлөрәк.* Ғ. Сәләм.

**РОМАН** [2] [*рус.* романский ⟨ *лат.*]: **роман телдәре** латин теле нигеҙендә барлыҡҡа килгән телдәр төркөмө (итальян, испан, молдаван, португал, румын, француз һ. б.).

**РОМАНИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Роман телдәренән үҙләштерелгән һүҙ йәки әйтем.

**РОМАНИСТ** [1] [*рус.*] *и.* Роман авторы, роман яҙған яҙыусы. ■ *Һ. Дәүләтшина менән З. Биишева тәүге романистарыбыҙ иғтибарынан ситтә ҡала килгән көнкүреште һүрәтләүгә ҙур урын бирҙе.* М. Минһажетдинов.

**РОМАНИСТ** [2] [*рус.*] *и.* Романистика өлкәһендә эшләгән белгес. // *Романист ғалимдар.*

**РОМАНИ́СТИКА** [*рус.*] *и.* Роман телдәрен һәм культураһын өйрәнгән фәндәр; роман филологияһы.

**РОМА́НС** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Фортепьяноға йәки башҡа музыка ҡоралына ҡушылып йырлар өсөн яҙылған ҡатмарлыраҡ йөкмәткеле лирик йыр. *Пушкин шиғырҙарына яҙылған романс. Романс башҡарыу.* ■ *Йырсының репертуарында башҡорт, татар, рус композиторҙарының, рус классиктарының йырҙары, романстары ла ҙур урын алып тора.* З. Биишева.

**2.** Ғәҙәттә мөхәббәткә арнап яҙылған йыр тибындағы шиғыр. *Яҡуп Ҡолмой романстары. Романс яҙыу.*

**РОМАНТИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** 18 быуат аҙағында — 19 быуаттың тәүге яртыһында классицизм ҡанундары менән көрәшкән, милли һәм индивидуаль үҙенсәлектәрҙе сағылдырырға тырышҡан, идеаль геройҙарҙы һәм тойғоларҙы һүрәтләгән әҙәбиәт һәм сәнғәт йүнәлеше. *Байрон романтизмы. Гюго романтизмы. Героик романтизм. Революцион романтизм.*

**2.** Оптимизм менән һуғарылған һәм көслө образдар аша кешенең оло бурысын күрһәтергә ынтылған әҙәбиәт һәм сәнғәт методы. *М. Горькийҙың тәүге әҫәрҙәрендәге романтизм.*

**3.** Тормошто идеаллаштырыу, хыяллаштырыу менән билдәләнгән уй-тойғо; хыял. *Йәшлек романтизмы. Романтизмға әүәҫлек.*

**РОМА́НТИК** [*рус.*] *и.* **1.** Романтизм (1, 2 мәғ.) йүнәлешендәге кеше. *Француз романтиктары.* //*Романтик актёр.*

**2.** Кешене һәм тормошто идеаллаштырыусан хыялый кеше. *Хыял коло бит ул беҙҙең Сәлим, романтик!* И. Ғиззәтуллин.

**РОМАНТИ́К** *с.* **1.** Романтизмға (1, 2 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Романтик драма. Романтик поэзия. Романтик стиль.*

**2.** Хыялға бирелеүсән, кешене һәм тормошто идеаллаштырыусан; хыялый. *Романтик ҡыйыулыҡ.* ■ *Ул сакта ни бөтә ҡорал — носилка ла көрәк, көрәк өҫтөнә талмаҫ беләк, беләк өҫтөнә романтик йөрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 31 ғинуар.

**РОМА́НТИКА** [*рус.*] *и.* **1.** Тормошто идеаллаштырыу, хыяллаштырыу менән билдәләнгән уй-тойғо; хыял. *Буш саҡтарҙа Новиков романтикаға бирелеп китә ..* Д. Юлтый.

**2.** Юғары рух, көслө тойғо менән билдәләнгән хәл. *Көрәш романтикаһы.* ■ *Беренсе биш йыллыҡ төҙөлөштәренең хыялға килмәҫлек ҡоласы, сит-ят ерҙәр күреү, ҡатмарлы һөнәрҙәргә өйрәнеү романтикаһы Ғабдулланы ла мауыҡтырҙы.* Д. Исламов.

**РОМАНТИКЛАШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **романтиклаштырыу.** *Романтиклаштырылған тормош.* ■ *Ярлылар .. властар «ҡараҡ» тип иғлан иткән тоткондарҙы батырҙар дәрәжәһенә күтәргән. Уларҙың эштәре романтиклаштырылған.* Ғ. Әмири.

**РОМАНТИКЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Берәй нәмәне, кешене романтик күҙлектән күреү; идеаллаштырыу. *Тормошто романтиклаштырыу. Ваҡиғаны романтиклаштырып һөйләү.*

**РОМА́ШКА** *и. шул уҡ* **аҡ сәскә** (*ҡар.* **сәскә**). *Һары ромашка. Аптека ромашкаһы.*

**РОМБ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Мөйөштәре тура булмаған тигеҙ яҡлы параллелограмм.

**2.** 1943 йылға тиклем Совет Армияһының юғары командирҙар дәрәжәһен күрһәткән шул формалағы билдә. *Петлицаларына икешәр ромба ҡаҙалған.*

**РОМШТЕ́КС** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Телгеләп, онталған сөхариҙа әүәләп ҡыҙҙырылған һыйыр ите.

**РО́СТБИФ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Ҙур көйө ҡыҙҙырылған һум һыйыр ите.

**РОСТОВЩИ́К** [*рус.*] *и.* Ҙур процент алыу шарты менән бурысҡа аҡса бирә торған кеше. *Ростовщик ссудаһы.* ■ *Ростовщик үтескә биргән һәр йөҙ рупий өсөн процент рәүешендә егерме биш рупий ала.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 19 июнь.

**РО́ТА** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и.* Батальон эсенә ингән ғәскәри берәмек. *Автоматчиктар ротаһы. Пулемёт ротаһы. Штаб ротаһы.* ■ *Беҙҙең рота һалдаттары күпер эшләргә, окоп ҡаҙырға йөрөй.* Д. Юлтый. *Минең янда төҙәп ата ине рота командиры Йәләйев.* Р. Ниғмәти.

**РОТАПРИ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Әҙ тиражлы баҫма өсөн тәғәйенләнгән ҡульяҙманы фотомеханик йәки электрографик ысул менән күсереп ишәйтә торған бәләкәй машина һәм шул күсереү ысулы. *Ротапринтта баҫылған китап. Ротапринт баҫмаһы.*

**РОТА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡульяҙма, һыҙма һәм һүрәттәрҙе трафаретлы баҫма ярҙамында ишәйтә торған аппарат. *Ротаторҙа баҫыу.*

**РО́ТМИСТР** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и.* Революцияға тиклемге атлы, йәйәүле ғәскәрҙәге һ. б. капитанға тиң дәрәжә һәм шул дәрәжәләге офицер.

**РО́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. тех.* Турбина, электр двигателе кеүек машинаның әйләнеп торған өлөшө. *Фазалы ротор. Двигатель роторы. Машина роторы. Насос роторы.* ■ *Быраулы торба ротор аша үтеп, ергә индереләсәк. Бына ротор әйләнер*

*ҙә .. бырау ер күкрәген кимерә башлар.* К. Мәргән.

**РОТОРЛЫ** *с.* Ротор ярҙамында эшләгән. *Роторлы двигатель. Роторлы насос. Роторлы экскаватор.* ■ *Беҙҙә эшләнгән һәм хеҙмәт күрһәткесен ун тапҡырға арттырыуға иҫәпләнгән .. роторлы конвейер линияһы киң ҡулланыу табасаҡ.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 19 апрель.

**РОЯЛИ́ЗМ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и. кит.* Король власына булған тоғролоҡ.

**РОЯЛИ́СТ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и. кит.* Король власына тоғро кеше. *Роялистарға ҡаршы көрәш.*

**РОЯ́ЛЬ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Ҡылдары горизонталь йүнәлештә тартылған баҫмаҡлы ҙур музыка ҡоралы. *Рояль баҫмағы. Рояль ҡапҡасы. Рояль ҡылдары. Роялдә уйнау.*

**РӨБӨҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Дүрттән бер өлөш; сирек. **Рөбөғө мәскүн** ер шарының кеше йәшәгән дүрттән бер өлөшө. *[Хәҙрәт:] Һеҙ, мулла Вахит, рөбөғө мәскүндең күп ерҙәрен күреп ҡайттығыҙ.* М. Ғафури.

**РӨКУҒ** [*ғәр.*]: **рөкуғ ҡылыу** (*йәки* **итеү**) *иҫк. кит.* баш эйеү. *Бөтә хайуанат, нәбататтар баштарын эйеп, ҡояшҡа табан рөкуғ ҡылған төҫлө ине.* З. Өммәти. *Көсөм йыйҙым да алдыңда рөкуғ иттем, ҡулың тоттом.* М. Ғафури.

**РӨТБӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тотҡан дәрәжә. *Мөҙәрис рөтбәһе. Рөтбә табыу.* ■ *Исеме булған Төкөмбәт, һәр шаһтарға ҙур һиммәт, рөтбәһе бик киммәт, урыны булһын йәннәт!* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**РӨХСӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кемгәлер бер нәмә эшләү өсөн бирелгән ризалыҡ. *Рөхсәт алыу. Рөхсәт һорау.*

**2.** Кемгәлер бер нәмә эшләргә бирелгән хоҡуҡ; ирек, ихтыяр. *Миңә [һалдау менән] балыҡ төртөргә бүтән рөхсәт булмаясаҡ.* Н. Мусин. *Үткәндәрҙе хәтерләргә рөхсәт бирегеҙ.* Ғ. Хәйри.

□ **Рөхсәт итеү** (*йәки* **биреү**) 1) нимәгәлер риза булыу. *Әмирханов .. президиумға мөрәжәғәт итеп: — Мин дә үҙебеҙҙең телдә һөйләйем,— тине. Уға рөхсәт бирҙеләр.* С. Агиш. *Хәйерсе батшанан бер йыр йырларға рөхсәт һораған. Батша рөхсәт иткән* (Әкиәттән); 2) ниҙер эшләргә хоҡуҡ биреү; кемдеңдер ихтыярына, иркенә ҡуйыу. *[Батша] Өйрәнсеккә һарайында үҙе теләгәнсә йәшәргә, эшләргә рөхсәт иткән.* З. Биишева.

◆ **Рөхсәт итегеҙ** ниҙер эшләр алдынан кешегә ихтирам йөҙөнән ризалыҡ һорап әйтелә.— *Беҙгә ҡотлау телеграммаһы бар. Уҡып ишеттерергә рөхсәт итегеҙ.* Б. Бикбай. **Рөхсәт ҡағыҙы** берәй нәмә өсөн булған яҙма рөхсәт.

**РӨХСӘТНАМӘ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Ниҙер эшләргә, алырға рөхсәт биргән ҡағыҙ; рөхсәт ҡағыҙы. *Рөхсәтнамә биреү. Рөхсәтнамә яҙыу.*

**РӨХСӘТҺЕҘ** *р.* Кемдеңдер рөхсәтенән, ризалығынан тыш. *Рөхсәтһеҙ алыу. Рөхсәтһеҙ инеү. Рөхсәтһеҙ китеү. Рөхсәтһеҙ-ниһеҙ эшләү.*

**РӨШДИ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Икенсе баҫҡыс (мәктәпкә ҡарата). *Хәҙерге бишенсе класҡа тап килгән рөшди беренсе класҡа нисек алынғанымды мин хәҙер ҙә асыҡ ҡына әйтә алмайым.* Ғ. Ғүмәр.

**РУБЕ́Ж** [*рус.*] *и. кит.* **1.** Нимәнелер айырып торған шартлы һыҙыҡ; сик. / *күсм.* Ниҙелер икенсеһенән айырып торған нәмә; сик. *Өлгәшелгән рубеж.* / Дәүләт сиге. *Совет иленең рубеждары ышаныслы һаҡлана.*

**2.** *хәрби* Һуғыш алып барыу өсөн уңайлы йәки махсус нығытылған урын һыҙаты: һыҙыҡ. *Һуңғы рубеж. Рубежды тотоу. Яңы рубежға күсеү.* ■ *Эскадрон яңы рубежға килеү менән нығыныу эшенә керешә.* С. Әлибаев.

**РУБЕРО́ИД** [*рус.* 〈 *лат.* 〈 *гр.*] *и.* Түбә ябыу һәм изоляция яһау өсөн махсус состав һеңдереп эшләнгән ҡатырға.

**РУБИ́ДИЙ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Химик элемент, үҙенсәлектәре буйынса калий һәм натрийға оҡшаған, аҡ буҙ төҫтәге йомшаҡ металл.

**РУБИ́ЛЬНИК** [*рус.*] *и.* Электр тогын тоташтыра йәки өҙә торған тотҡалы ҡулайлама. *Рубильникты тоташтырыу.*

**РУБИ́Н** [*рус.* 〈 *ит.*] *и.* Ҡыҙыл төҫтәге аҫыл таш; ҡыҙыл яҡут. *Синтетик рубин.* ■ *Юл күрһәтеп бөтә юлсыларға [Кремлдә] рубин йондоҙҙары яналар.* С. Ҡудаш.

**РУ́БКА** [*рус.* 〈 *гол.*] *и.* Караптың өҫкө палубаһында йәки өҫкө ҡоролмаһында борттарға еткермәй эшләгән ябыҡ урын. *Руль рубкаһы.* / Караптың йөрөтөүселәр өсөн тәғәйенләнеп, карапҡа идара итеү постары урынлашҡан эш бүлмәһе. *Командир рубкаһы. Штурман рубкаһы. Хәрби рубка.* / Дирижаблдә, радиостанцияла һ.б. идара итеү приборҙары менән оҡшаш тәғәйенләнгән эш урыны. *Радио рубкаһы.*

**РУ́БРИКА** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Газета, журналдағы дөйөм тематик бүлек атамаһы. *«Совет Башҡортостаны» газетаһындағы «Йырҙарыбыҙ, көйҙәребеҙ» рубрикаһы.*

**2.** Айырым бүлек, графа. *Рубрика менән биреү.*

**РУДА́** [*рус.*] *и.* Составында металл йәки уның берләшмәләре булған тәбиғи минераль сырье. *Байыҡтырылған руда. Алтын рудаһы. Руда байыҡтырыу фабрикаһы. Руда ҡаҙыусы.* ■ *Өмөтбай иртә менән китеп, ер ҡаҙып, руда эҙерләй.* Ғ. Дәүләтшин. *Сибай рудаһы составында баҡыр, цинк һәм көкөрттән башҡа байтаҡ ҡына киммәтле ҡушымталар .. бар.* М. Хисмәтов.

**РУДАЛЫ** *с.* Руда ятҡылыҡтары булған. *Рудалы тауҙар. Рудалы таштар. Рудалы ятҡылыҡтар.*

**РУДИМЕ́НТ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** *биол.* Организмдың эволюцион үҫеше осоронда тәүге әһәмиәтен юғалтып, камиллашмай ҡалған ағза.

**2.** *күсм. кит.* Юҡҡа сыҡҡан күренештең эҙе, ҡалдығы.

**РУДИМЕНТАР** [*рус.* рудиментарный]: **рудиментар ағза** *биол. ҡар.* **рудимент** 1.

**РУДНИ́К** [*рус.*] *и.* Файҙалы ҡаҙылма байлыҡтарҙы сығарыу өсөн булған ер аҫты ҡоролмалары системаһы һәм шул сығарыу эшен башҡарған тау промышленносы предприятиеһы. *Баҡыр рудниғы. Тимер рудниғы.* ■ *Башҡортостан баҡыр-көкөрт комбинатының рудниғында көнө-төнө эш ҡайнай.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 7 март. **Асыҡ рудник** карьер.

**РУЗ** [*фарс.*] *и. иҫк.* **1.** Көн, көндөҙгө ваҡыт.

**2.** Хәл-әхүәл. *[Заятүләк:] Инеп килдем атымдан һинең рузыңа.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**РУЗГӘР** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Тереклек, ғүмер. .. *Сәләмәтлек илә рузгәр кисермәгебеҙгә сәбәпселәрҙер.* «Батыршаның хаты».

**2.** Ел.

**РУЗИ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* **1.** *кар.* **ризык.**

**2.** Яҙмыш. *Был һугышта кайҙа беҙгә изге гәмәл, бер хоҙайым иман рузи кылһын имде* (Бәйеттән).

**РУЗНАМӘ** [*фарс.*] *и. иҫк.* **1.** Газета.

**2.** Көндәлек дәфтәр.

**РУЛЕВО́Й** [*рус.*] *и.* Рулен тотоп, карапка йүнәлеш биргән кеше. *Рулевой булып эшләү.*

**РУЛЁТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. кар.* **катлама** 1.

**РУЛЁТКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Оҙонлоҡ үлсәүе итеп ҡулланыла торған сантиметрлы таҫма. *Металл рулетка. Рулетка менән үлсәү.*

**РУЛО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Тығыҙлап уралған нәмә (ҡағыҙ, тауар һ. б.). *Бер рулон тауар. Ҡағыҙ рулоны. Толь рулоны.*

**РУЛЬ** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Карап, самолет һәм төрлө машинаны бороп йөрөтә торған ҡулайлама. *Велосипед руле.* ■ *Килә шофер, елә шофер, руле төшмәй ҡулдарҙан.* Р. Ғарипов.

**РУМЫ́Н** *и.* Румынияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләтең бер кешеһе (роман телдәренең береһендә һөйләшә). *Румын халкы. Румын катыны. Румын теле.*

**РУН** [*рус.* руны [1] ⟨ *сканд.*] *и.* Ташҡа һәм төрлө ҡорал-ҡорамалға яҙып ҡалдырылған боронғо хәреф системаһы. *Рун яҙмалары.* ■ *Башкорт тамғалары үҙҙәренең яҙылыу рәүеше, һыҙылышы менән боронғо төрки яҙмаларын тәшкил иткән рун яҙыуҙарын хәтерләтә.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 17 декабрь.

**РУНА** [*рус.* руны [2] ⟨ *фин.*] *и.* Карел, фин һәм эстон халыҡтарының боронғо йыры.

**РУПИЙ** [*рус.* рупия ⟨ *санскр.*] *и. кар.* **өрфөйә** [1]. *Рупийҙың халык-ара акса әйләнешендәге киммәте.*

**РУ́ПОР** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Тауышты көсәйтеп, кәрәк яҡҡа йүнәлтеү өсөн хеҙмәт иткән конуслы торба. *Үҙәк аллеяға ҡуйылған радио рупоры тирәһендә халыҡ туп-тулы. Ә радионан хөкүмәт белдереүе тапшырыла.* Я. Вәлиев.

**РУС** *и.* Россия төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләтең бер кешеһе (славян телдәренең береһендә һөйләшә). *Рус катыны. Рус теле. Рус халкы. Рус әҙәбиәте.*

**РУСИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Рус теленән үҙләштерелгән һүҙ. *Башкорт телендәге русизмдар.*

**РУСИ́СТ** [*рус.*] *и.* Русистика буйынса эшләгән белгес.

**РУСИ́СТИКА** [*рус.*] *и.* Рус. телен һәм культураһын өйрәнгән фәндәр; рус филологияһы.

**РУСЛАШТЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **руслаштырыу.** *Руслаштырылған алфавит.*

**РУСЛАШТЫРЫУ** *к.* Теле, ғөрөф-ғәҙәте буйынса русҡа әйләндереү. *Батша хөкүмәте контрреволюция ҡоторонған осорҙа Россияның милли окраиналарында руслаштырыу политикаһын көсәйтә.* «Башҡорт АССР-ы тарихы», 1966.

**РУСЛАШЫУ** *к.* Теле, ғөрөф-ғәҙәте буйынса русҡа әйләнгән.

**РУССА** *р.* **1.** Рус телендә. *Русса һөйләшеү. Русса уҡыу. Русса белеү.* ■ *Сания .. белер-белмәҫ теле менән емереп-ватып русса һөйләшкән була.* М. Тажи.

**2.** Рус халҡына хас. *Русса бейеү. Русса кейенеү.*

**РУССАЛАУ** *к.* Русса әйтеү. *Мин, тауышымды сығармай ғына, руссалап «позволь» тинем.* С. Агиш. *Атайым, руссалап ниндәйҙер һүҙҙәр әйтеп, Ҡарауыҙҙың [эттең] алдына йәнә бер киҫәк икмәк ырғытты.* С. Кулибай.

**РУССАЛАШТЫРЫУ** *к.* Руссаға әйләндереү. *Ауыл исемдәрен руссалаштырып һөйләү.*

**РУТЕ́НИЙ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Химик элемент, платина төркөмөнә ингән аҡ буҙ төҫтәге еңел ҡаты металл (перолар, ювелир нәмәләре, лаборатория һауыттары эшләү өсөн ҡулланыла).

**РУТИ́Л** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Аҡ, һарынан алып ҡусҡыл ҡыҙыл төҫкә тиклем булған минерал. *Синтетик рутил.* ■ *Белорет калаһының мәктәп укыусылары рутил яткылыктарына тап булды.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 22 ноябрь.

**РУТИ́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Сәй япрағында, ҡарабойҙайҙа була торған бай витаминлы матдә (дарыу итеп ҡулланыла).

**РУХ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Дини ҡараша, кеше һәм йәнлектәрҙе мәңге тере итә торған, материаль булмаған үлемһеҙ башланғыс (үлем килгәндә, тәндән сығып, күккә оса). *[Апаһы — Кәбиргә:] Бына бөгөн мулла сакырып, еҙнәңдең рухы өсөн көрьән укытырға йыйынам.* С. Агиш. *Бер минут, эруах вә рухтар, осмағыҙ, тәңрем жыулар. Белмәһен ул, белһә куркыр.* Б. Мирзанов. / Үлгән кешенең тәндән сығып үҙ алдына күҙгә күренмәҫ хәлдә йәшәгән, тәбиғәттән өҫтөн үлемһеҙ шәүләһе (кеше араһына килеп йөрөй). *Изге рух. Шәһит рухтар.* ■ *Таш һәм тауҙар куҙғала. Үлгән батырҙарҙың рухы кулына корал ала.* С. Ҡудаш. **Әруахтар рухы** *дин.* үлгән кешеләр рухы. *[Хужа:] Хәҙрәт, эруахтар рухына бирәр аят рәхим итегеҙ.* М. Ғафури.

**2.** Материалистик философияла: юғары үҫеш кимәлендәге материяның үҙенә генә хас сифаты булған аң-фекер. *Рух материяның иң юғары продукты.* / Идеалистик философияла: бөтә нәмәнең, күренештәрҙең нигеҙендә ятҡан материаль булмаған башланғыс.

**3.** Кешенең эске уй-тойғоһо; күңел, йән. *Беҙ Индрилдең рухына төшөнөп бөткәнбеҙ.* Д. Юлтый. *Кисе лә, хикәйәте лә һине ирекһеҙҙән уйланырға, тормоштоң матурлығы, кеше рухының гүзәллеге .. хакында уй йөрөтөргә мәжбүр итә бөгөн.* З. Биишева. *Кешегә үҙ акылы ғына етмәй, башкаларға ла, боронғоға ла таянырға, ата — бабаларыбыҙ рухын да аңларға кәрәк.* Ә. Вахитов. / Кешенең эске хәле, мораль көсө. *Һугышсан рух. Рух биреү. Рух ныклығы. Рух төшөү.* ■ *Рухым күтәрелде минең дә, әйәрләнем мин дә атымды.* Салауат Юлаев. *Халык араһында һугышка каршы рух үҫә.* Д. Юлтый. **Рух өрөү** күңел күтәренкелеге биреү; дәрт, көс биреү. *Бер йылмайып күлөүҙәре күңелемә рух өрә* (Халыҡ йырынан).

**4.** *күсм.* Нәмәнең нигеҙен билдәләгән төп йүнәлеш, характерлы үҙенсәлек, асыл. *Коммунизм рухында тәрбиәләү.* ■ *М. Ғафуриҙың революцион-демократик рухтағы әҫәрҙәре хеҙ-*

*мәтсәндәр күңеленә барып етте.* Ғ. Рамазанов. *Хеҙмәт коллективтары .. үҙ ағзаларын коммунистик әхлак рухында тәрбиәләй.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. / Кешенең үҙен тотошон, фекер йүнәлешен билдәләгән нигеҙ. *Ҡайһы сакта тормош тауҙай баҫа. Ҡыйыу барам. Идеал сакыра мине, фекерем, рухым сыныға шул сакта.* М. Хәй.

**РУХАН** [*гәр.*] *р. кит.* Рухи яктан, рухи йәһәттән. *Кеше гәйепләме: дуҫтарым, тормош кушһа рухан үлеүҙә?!* Ғ. Хәйри.

**РУХАНИ** [*гәр.*] *с.* **1.** Кешенең эске донъяһына, рухҡа мөнәсәбәтле: рухи. *Рухани аҙыҡ. Рухани көс.* ■ *Күл буйлап яңғырап киткән йыр тауыштары миңә рухани ләззәт бирә.* М. Ғафури.

**2.** Дингә мөнәсәбәтле: дини. *Рухани мәктәп.* / Дин хеҙмәтендәге. *Рухани кеше.* // *Мосолман руханиҙары. Руханиҙар фекере.* ■ *Урта Азияла, Волга буйында һәм Көньяҡ Уралда ислам диненең үҫә, нығый барыуы руханиҙар поэзияһының шәйехе булған Әхмәт Ясауиҙың киҫәрәк популярлашыуы өсөн шарт тыуҙыра.* Ә. Харисов.

**РУХАНИЛЫҠ** *и.* Рухани вазифаһы.

**РУХИ** [*гәр.*] *с.* Кешенең эске донъяһына мөнәсәбәтле; рухани. *Рухи байлыҡ. Рухи донъя. Рухи ихтыяж. Рухи яҡынлыҡ.* ■ *Тормоштоң үҙәгенән, замандың тынғыһыҙ хәрәкәтенән шаукымланған образдар ғына уҡыусыны тулҡынландыра, уға рухи аҙыҡ бирә ала.* Ә. Хәкимов.

**РУХИӘ** [*гәр.*] *и. иҫк. кар.* **рух** 2, 3. **Әхүәле рухиә** рухи хәл. *Мин шәкерттәрҙең әхүәле рухиәләре менән танышып, Буби менән көрәштем.* М. Ғафури.

**РУХ-ЙӘН** *и. йыйн.* Рух һәм йән. *Ни өсөн унан шағир илһамлана, шиғырына мәңгелек рух-йән ала?* Ш. Бабич.

**РУХЛАНДЫРЫУ** *к.* Күңел күтәренкелеге биреү; дәрт, көс өҫтәү; илһам, дәрт, көс уятыу. *Көрәшкә рухландырыу. Эшкә рухландырыу.* ■ *Шиғырың менән рухландырып, һалдың беҙҙе аҡ юлға.* Ш. Бабич.

**РУХЛАНЫУ** *к.* Рухи көс алыу; күңелләнеү, дәртләнеү. *М. Ғафури санаторийҙа яңы эшкә рухланып, Өфөгә ҡайтып китте.* «Әҙәби Башҡортостан», 1960, 6.|Кәйеф күтәрелеү, күңелләнеү. *Әхмәтгәле Биби карсыкты күргәс, рухланып: «Ай-һай, беҙҙең әбей! Эште булдырғандыр, ахыры»,— тине.* М. Ғафури.

**РУХЛЫ** *с.* **1.** Рухи яҡтан көслө, оло хисле. *Ул Украинаның иң матур, иң моңло йырҙарын белә. Тауышы .. тыңлауға бик яғымлы һәм рухлы.* Д. Юлтый.

**2.** Күтәренке рух менән һуғарылған, юғары рухи көскә эйә. *Былар [төрлө һөнәр кешеләре] араһында урамда революцион рухлы, ысын производство эсенән сыҡҡан юлбашсылар ҙа бар ине.* З. Шәрҡи.

**РУХҺЫҘ** *с.* **1.** Рух (3 мәғ.) яғынан көсһөҙ, хисһеҙ. *Рухһыҙ кеше.* ■ *Яңылышалар улар миңә бабай исемен биреп нигеҙһеҙ. Әгәр бабай булһам, булыр инем мин рухһыҙ, дәртһеҙ, ялҡынһыҙ.* М. Ғафури.

**2.** Рухы (3 мәғ.) төшкән, рухи көсө булмаған. *Рухһыҙ күңел.* // *Рухһыҙ эшләү.*

**РУХҺЫҘЛАНЫУ** *к.* Рух (3 мәғ.) төшөү; күңелһеҙләнеү, төшөнкөләнеү. *Рухһыҙланып килеп инде.*

**РУХҺЫҘЛЫҠ** *и.* Рух (3 мәғ.) төшөнкөлөгө; рух (3 мәғ.) төшкән хәл.

**РУ́ЧКА** [*рус.*] *и.* Ҡара менән яҙа торған ҡәләм. *Автомат ручка. Шариклы ручка.* ■ *Ручка алып, ул әллә нимә яҙа башланы.* С. Агиш.

**РЫЦАРЬ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. тар.* Көнбайыш Европала Урта быуаттарҙа ер биләүсе хәрби ҡатлам вәкиле. *Немец рыцарҙары. Швед рыцарҙары.* / Ауыр ҡорал менән ҡоралланған һыбай һуғышсы. *Атлы рыцарь.*

**РЫЧА́Г** [*рус.*] *и.* Машинаның нимәнелер яйлай, ҡуҙғата торған тотҡалы кендеге. *Тиҙлек рычагы.* ■ *Рычагты үҙемә тартып, акселераторға баҫтым. Танк әле баҫыу юлына, әле аҙыраҡ ком һибелгән таш юлға барып сыға.* Ғ. Аллаяров.

**РЫЯ** [*гәр.*] *и.* **1.** Ике йөҙлөлөк, яһалма яҡшылыҡ, ихласһыҙлыҡ. *Мин хәҙер ишан тирәһендәге рыялар хаҡында, шәкерттәрҙең ялҡаулыҡтары хаҡында бик нык һөйләй башланым.* М. Ғафури.

**2.** *с. мәғ.* Ике йөҙлө, ялған. *Рыя кеше.* ■ *Хәсән .. наҙан муллаларҙы, рыя суфыйҙарҙы, алдаҡсы ишандарҙы һөймәй.* З. Һаҙый. / Ихласһыҙ, арамья. *Рыя эш.* // *Рыя эшләү.* ■ *Үпкәләһәң, үпкә ашарһың: һәммә эштәрең рыя.* Ш. Бабич.

**РЫЯЛАНЫУ** *к.* **1.** Ике йөҙләнеү, яҡшатланыу.— *Һин кабинетыңа индергәс, рыяланып, тәүҙә папирос тәкдим итәһең, .. шунан йырткыс януар кеүек талай башлайһың.* С. Әлибаев.

**2.** Эшкә һ. б. ҡарата ихласһыҙлыҡ күрһәтеү; арамъяланыу. *Рыяланып эшләгән эшенең рәте юҡ.*

**РЫЯҺЫҘ** *с.* **1.** Хәйләһеҙ, эскерһеҙ, ихлас. *Рыяһыҙ дуҫ. Рыяһыҙ мөнәсәбәт.* // *Рыяһыҙ ҡарау.* ■ *Окшаны кәлбең, һүҙең һәм нурға сумған килбәтең. Был рыяһыҙ бер генә ҡат һүҙҙәремде ит гәфү.* Ш. Бабич.— *Дуҫкайым,— тип рыяһыҙ һуҙһам ҡулымды дуҫ итеп, гел уҫаллыҡтар менән тулған ҡара бер эс күрәм.* Д. Юлтый.

**2.** Еренә еткереп, хәйләһеҙ эшләнгән. *Рыяһыҙ эш.* // *Рыяһыҙ эшләү.*

**РӘБӘҒӘТҺЕҘ** *с.* Ҡылыҡ-ҡиәфәте килешһеҙ, яман. *Рәбәғәтһеҙ кеше.* // *Рәбәғәтһеҙ һөйләшеү.*

**РӘҒАЯ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Бер илдең халҡы.

**РӘҒБӘТ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Теләк, ынтылыш. *Күңел рәғбәте.* ■ *Пётр батшаның төньяҡ тарафта Балтик диңгеҙенә, төшлөк яғына Ҡара диңгеҙгә сығыу рәғбәте бик ҙур ине.* М. Һаҙыев.

**2.** Өлгө, үрнәк. *Хоҙауәндә, фазлың илә һин мәҙәт ҡыл, барса мөьминдең күңелен рәғбәт ҡыл* (Мөнәжәттән).

**РӘҒЕМ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Нәфрәт. *Дуҫтар бар, кире ҡағыр рәғемегеҙҙе.* Аҡмулла.

**РӘҒИӘ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Билдәле бер дәүләт кешеһе, гражданы.

**РӘҒИӘТ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Билдәле бер дәүләт граждандары, бер илдең халҡы. *Һамар һыуының шимал тарафы Кусем ханға булды, рәғиәте башҡорт ине.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

□ **Рәғиәт итеү** баш һалдырыу, буйһондороу.

*Әүүәл ошо шаһыбыҙ үҙенә камил тәбиғ рәғиәт итеп алып, ҡайһыларына бейлек һәм кенәзлек мәрхәмәт итеп бирҙе.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**РӘҒӘШӘ** [*ғәр.*] *и.* Ҡалтыраған, дерелдәгән хәрәкәт. *Тышта шәдитле буран асыулы-асыулы рәғәшәләр илә ыуылдай ине.* Ә. Таңғатаров.

**РӘД** [*ғәр.*]: **рәд итеү** *кит.* кире ҡағыу. *Һ. Дәүләтшина әҫәрҙәренең .. тел яғынан гәжәп юғары тороуын кем рәд итә ала?* М. Минһажетдинов. *Мең мулла рәд ҡылһа ла ни ҡайғы бар.* Аҡмулла.

**РӘДИФ** [*ғәр.*] *и.* Көнсығыш поэзияһында: һәр шиғыр юлындағы рифманан һуң ҡушымта булып ҡабатланып килгән һүҙ йәки һүҙҙәр төркөмө.

**РӘЖА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Үтенес. *Алтын биреп алмайҙар ләмма рәжа.* Аҡмулла.

**РӘЖЕМ** [*ғәр.*]: **рәжем ҡылыу** *иҫк.* шәриғәт буйынса, ғәйепле кешене таш бәреп язалау өсөн билдән ергә күмеү. *Бер кеше хатабыҙҙы һөйләп бирһә, ҙур гөнаһлы иблистән дә яман күреп, рәжем ҡылып, бисараға таш атабыҙ.* М. Ғафури.

**РӘЖӘП** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ай календарының етенсе айы (*ҡар.* **календарь**).

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

◆ **Рәжәп байрамы** Мөхәммәтең етенсе ҡат аллаға күтәрелгән көнөн билдәләгән дини байрам.

**РӘИС** [*ғәр.*] *и.* **1.** Башлыҡ, түрә. *Ауыл советы рәисе. Идара рәисе. Рәис булып эшләү.* ■ *Ауыл советы рәистәренең составы элеккегә сағыштырғанда күп кенә яҡшырҙы.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**2.** Йыйылышты алып барған кеше. *Башҡа һөйләүселәр булманы. Рәис яңы планды тауышҡа ҡуйҙы.* Б. Ишемғол. *Байрам үткәс бер оло мәжлес була, сәркәтип бер ен, рәис Иблис була.* Ш. Бабич.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**РӘҠИП** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Конкурент. *Рәҡиби Рәҡип, рәҡибең булды Рахманғол вафат.* Ш. Бабич.

**2.** Һаҡтағы күҙәтсе.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**РӘҠӘҒӘТ** [*ғәр.*] *и.* Намаҙҙың аяҡ үрә тороу, эйелеү, йөҙ һалыуҙы эсенә алған бер бүлеге. *[Ишан кейәүҙе] эҙләп йөрөгән булдылар. Табылғас, ул бер рәттән ун-ун биш рәҡәғәт намаҙ уҡыған.* Ғ. Ғүмәр.

**РӘНЕК** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Буяу, төҫ. *Сәсе ҡуңыр рәнектә булған.* Аҡмулла.

**2.** *кусм.* Хәйлә, ике йөҙлөлөк. *Табалар истирахәтте төрлө франкта, хәмелен вазих итәләр төрлө рәнектә.* М. Өмөтбаев.

**РӘНЙЕТЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **рәнйеү** [1]. *Нахаҡҡа рәнйетелеү.* ■ *Сит ерҙәрҙә рәнйетелеп үткәндә һәр бер көнөм. Төштәремә керә инең ҡаяла үҫкән гөләм.* Н. Нәжми.

**РӘНЙЕТЕҮ** *к.* **1.** Кемделер насар һүҙ әйтеп, мөнәсәбәт күрһәтеп, урынһыҙға кәмһетеү, хәтерен ҡалдырыу; йөрәкте әрнетеү, йәберләү. *Хәтере бик нык ҡалды Хәтирәнең. .. Егерме өсө лә тулмаҫ элек тол ҡалған китек күңелле ҡатынды рәнйетер өсөн күпме генә кәрәк.* Ф. Исәнғолов. *Абдулланың бөтә эше — кешегә яла яғыу, нахаҡтан кеше рәнйетеү, берәүҙе икенсегә яманлап, уларҙы ыҙғыштырыу.* Я. Хамматов.

**2.** Ҡаты ҡыланып, мәрхәмәтһеҙ булып, кешене ҡыйырһытыу, ҡыҫыу, ситкә тибеү. *[Командир:] Беҙгә кешеләрҙе рәнйетеп, ризалыҡһыҙ, көс менән тартып алынған ат кәрәкмәй.* Н. Мусин.

**РӘНЙЕҮ** [1] *к.* **1.** Кемдеңдер насар мөғәмәләһенә үпкәләү, йөрәк әрнеү, йәберһенеү. *Берәй иҫке-моҫконан әтмәләштереп күлмәк тегеп кейҙерһәләр, быға Хәлкәйҙең бала күңеле рәнйей торғайны.* Д. Юлтый. *Атайың да, әсәйең дә улыбыҙ хәлебеҙҙе белергә килмәй, тип, бик рәнйейҙәр, тип әйтерһең* (Әкиәттән).

**2.** Килешмәү, риза булмау, күңел менән ҡаршы булыу. *[Әсә улына:] Бар, мулла атайың рухына доға ҡылһын ...Беҙгә рәнйеп ятмаһын тағы — әруахтарҙың күңелен табырға кәрәк.* А. Карнай.

**РӘНЙЕҮ** [2] *и.* Ҡаты ауырыу; зәхмәт. *Рәнйеү ҡағылған. Ваба рәнйеүе.*

**РӘНЙЕҮЛЕ** [1] *с.* Кемдеңдер насар мөғәмәләһенә үпкәләү белдергән; йәберһенеүле. *Рәнйеүле ҡараш.* ■ *Нәғимә рәнйеүле тауыш менән: — Әллә ҡайҙа йөрөп, күрмәгәндәй әсәһең дә, эштән сығып ҡайтаһың,— тине.* М. Ғафури.

**РӘНЙЕҮЛЕ** [2] *с. һөйл.* Ауырыу тейгән; ауырыу. *Рәнйеүле кеше.*

**РӘНЙЕШ** *и.* **1.** Хаҡһыҙлыҡҡа, кәмһетелеүгә, ҡыйырһытыуға, йәберләүгә ҡаршы тыуған әрнеү, әсенеү тойғоһо. *Сәлим ағай әсмәҫкә тип дөйөм йыйылышта .. биргән вәғәҙәһен бөгөн оноҡҡаң. Уның күңелендә хәҙер тик бер генә нәмә бар: рәнйеш .., рәнйеш.* Х. Мохтар.

**2.** Яман теләк, ҡарғыш. *Рәнйеш төшөү. Рәнйештән булмаһын.*

**РӘНЙЕШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **рәнйеү** [1].

**РӘПӘТҺЕҘ** *с. диал.* Рәбәғәтһеҙ.

**РӘСЕМ** [*ғәр.*] *и.* Берәй нәмәнең ҡәләм, перо һ. б. менән һыҙып йәки буяҡ менән буяп үҙенә оҡшатып яһалған күсермәһе; һүрәт. *Рәсемдәр альбомы. Рәсем сәнғәте. Рәсем төшөрөү.* ■ *Ул [Сәғиҙә] рәсем дәфтәренә көҙгө тәбиғәт күренештәренән бер нисә эскиз һыҙып алды.* М. Тажи. *Бер рәсемдә Ленин тора уң ҡулын һуҙып алға.* Р. Ниғмәти.

◆ **Рәсемгә төшөү** фотоға төшөү. **Рәсме хат** һәр кешенең үҙенә хас яҙыу рәүеше; почерк. *Рәсме хатты суә истиғмал ҡылыуҙан һин оял.* Ш. Бабич. **Фото рәсем** фотография ысулы менән эшләнгән рәсем.

**РӘСЕМЛЕ** *с.* Рәсем төшөрөлгән; һүрәтле. *Рәсемле журнал. Рәсемле китап.*

**РӘСМИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Хөкүмәт, идара йәки вазифалы кеше урынлаштырған, сығарған. *Рәсми документ. Рәсми хәбәр. Эшкә рәсми төҫ биреү. Рәсми рәүештә баҫып сығарыу. Рәсми рәүештә белдереү.* ■ *Урамдарҙа хәҙер боронғо рәсми кейемдә торған полиция урынында, төрлө кейемдә, төрлө төҫтә, төрлө ҡорал менән ҡоралланған милиционерҙар тора.* М. Ғафури. / Хөкүмәт, идара һ. б. вәкиле булған. *Рәсми кеше.* / Хөкүмәт документтарына, эш ҡағыҙҙарына хас. *Рәсми терминология.*

**2.** Бөтә ҡағиҙәләре, формаль яҡтары һаҡланған. *Рәсми визит. Рәсми ултырыш. Йыйылышты рәсми рәүештә ябыу. Рәсми рәүештә осрашыу.*

■ *Мәжлестең рәсми бүлеге башланды.* С. Агиш. *Халыҡ күңелендә ятҡан тәбиғи һәләтте рәсми юл ҡуймау, тыйыу саралары менән генә туҡтатып булмай.* К. Мәргән. / *күсм.* Үтә етди, тотанаҡлы; ҡоро ғына. *Рәсми киәфәт. Рәсми мөнәсәбәт. Рәсми тон.*

**РӘСМИЛЕК** *и.* **1.** Рәсми хәл. *Хәбәрҙең рәсмилеге. Визиттың рәсмилеге.*

**2.** Рәсми төҫ, рәсми мөрәжәғәт. *Рәсмилекте тотоу. Рәсмилекте юғалтыу.*

**РӘСМИЛӘШЕҮ** *ҡ.* Рәсми, законлы хәлгә килеү; рәсми, законлы төҫ алыу. *Рәсмиләшкән алфавит.*

**РӘСМИЛӘШТЕРЕЛЕҮ** *ҡ. төш кар.* **рәсмиләштереү.**

**РӘСМИЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ.* Рәсми, законлы хәлгә килтереү; рәсми, законлы төҫ биреү. *Байрамды рәсмиләштереү.* ■ *[Ғариф Шәмсиәгә:] Риза булһаң, миңә күс, миндә торорһоң. Эште, йәғни күсеүеңде, рәсмиләштерербеҙ.* Ғ. Хәйри.

**РӘСМӘН** [*ғәр.*] *р.* Рәсми рәүештә. *Улар араһындағы айырма рәсмән береһенең башҡорт, икенсеһенең типтәр тип йөрөтөлөүендә .. генә.* Т. Баишев.

**РӘССАМ** [*ғәр.*] *и.* Рәсем төшөрөү, һынлы сәнғәт оҫтаһы; художник. *Новосибирск ҡалаһына ситтән ҡарағанда күҙ алдына оҫта рәссам тарафынан бик матур итеп эшләнгән картина килеп баҫа.* М. Ғафури. *Рәссам аса үҙ донъяһын йәйғор буяуҙарға буятып.* Р. Ғарипов.

**РӘСҮЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **Илсе. Рәсүле алла** *йәки* **хәҙрәте рәсүл** алла илсеһе (Мөхәммәткә ҡарата әйтелә); пәйғәмбәр.

**РӘТ** [1] [*рус.*] *и.* **1.** Береһе янында икенсеһе торған, бер-бер артлы теҙелеп торған нәмәләр йәки шундай уҡ тәртиптә баҫҡан кешеләр теҙеме. *Бер рәт ултырғыс. Ике рәткә теҙелгән йорттар.* ■ *Ғариф ағай .. төшөп ҡалған һымаҡ арзан нәмә эләктерергә теләп, алам-һалам һатыусылар рәтендә темеҫкенеп йөрөмәй.* Б. Бикбай. **Бер рәттән** 1) береӊ эргәһенә береӊ һырынып, буйҙан-буй. *Бер рәттән ятыу.* ■ *Өстағанды .. ҡорҙолар ҙа, кейеҙ, балаҫ менән ябып, шуның эсенә өсөһө лә бер рәттән генә ятып .. йоҡлап киттеләр.* Т. Йәнәби; 2) берлектә, бергә. *Бөтә кеше менән бер рәттән эшләү.* ■ *Көндөҙ магазиндарға йөрөп .. башҡа приказчиктар менән бер рәттән кредитка [пирожки] алып ашайым.* С. Агиш; 3) бер ыңғай, бер юлы; бер-бер артлы. *Бер рәттән өс-дүрт бомба ярылды.* Д. Юлтый. / Театрҙа, кинола һ. б. ерҙә бер һыҙыҡта торған урындар. *Залда ултырыусылар бер-береһенә ҡарашып алды. Алдағы рәттән Йәнәҙаҡ карт [һүҙ һорап] ҡул күтәрҙе.* М. Тажи. / Бер һыҙыҡҡа теҙелгән строй; шеренга. *Рәткә теҙелгән һалдаттарҙы бер офицер сиратлап өҫтәл эргәһенә саҡыра.* Д. Юлтый.

**2.** Баҙарҙа һ. б. теҙелеп ултырған, бер төр тауар һата торған ларектар йәки прилавкалар. *Ваҡ-төйәк тауар рәте.* ■ *Баҙарҙа магазин алдын һеперел йөрөгән сторождар ғына [күренә]. Ит рәте тирәһенән бер нисә эт йүгереп сыҡты.* С. Агиш.

**3.** Һыҙат-һыҙат сәселгән йәшелсә һ. б. үҫемлектәр теҙеме; буй. *Киң рәтле сәсеү. Тар рәтле сәсеү. Рәт араһын тырматыу.* / Оҙон бер ер һыҙымы; буй. *Ошо бер рәттән ике күбә бесән сыҡты.*

**4.** *күсм.* Билдәле бер тәртип, нимәнеңдер үҙенең яйы, барышы, ағышы. *Рәтенә төшөнөү. Рәте сығыуы.* ■ *Рәт тә, сиратта юҡ., кемдең нимәгә көсө етә, шуны алып китә.* Б. Бикбай. **Рәте китеү** 1) билдәле тәртип боҙолоу, юғалыу. *Телефон бәйләнешенең рәте киткән .. Ғәскәрҙең ҡалай, ниндәй тәртип менән сигенеүҙәре тураһында дөрөҫ мәғлүмәт алып булмай.* Д. Юлтый; 2) тормош хәле ауырайыу. *Ашауҙың рәте китте;* 3)һаулыҡ ҡаҡшау, бирешеү. *Өҫтәүенә уның [ирҙең] сәләмәтлегенең рәте китте.* Х. Зарипов. **Рәтен ебәреү** нимәнелер эштән сығарыу, боҙоу, туҙҙырыу. *Яңы ғына алған костюмының рәтен дә ебәргән.* **Рәтен табыу** осраған ҡыйынлыҡты йырып сығыу; эште яйлау. *Көҙөн яңынан Ырымбурға килһәм дә, уҡыуҙы дауам итерлек рәт табып булманы.* Т. Йәнәби. *Ҡулаҡ, мулла, сауҙагәрҙәр рәт таба алмай дөмөккән* (Халыҡ йырынан). **Рәте сығыу** нимәлер булырға тороу, яйы килеү. *Ярай, бер булмаһа, бер рәте сығыр әле.* **Рәткә индереү** (*йәки* **керетеү**) 1) нимәнелер яйға һалыу, билдәле тәртип булдырыу. *Атыш аҡрынлап тынды .. Ике яҡ та ярайһы уҡ имгәтелгән сафтарын рәткә индерергә тотондо.* Д. Исламов; 2) һаулығын яҡшыртыу, төҙәтеү. *Үлгән ерҙән көскә рәткә индереп алдыҡ.* **Рәткә инеү** (*йәки* **кереү**) 1) нимәлер яйға һалыныу, билдәле тәртиптә урынлашыу. *Ҡасан ғына ташландыҡ ятҡан өй, хәстәрле ҡатын-ҡыҙ ҡулы тейгәс, кәҙимге рәткә кереп ҡалған.* Б. Бикбай; 2) һаулыҡ яҡшырыу, төҙәлеү. *Ауырып йығылып, саҡ рәткә инеп алдым.* **Рәткә һалыу** *кар.* **рәткә индереү.**

**5.** *күсм.* Кемдеңдер, нимәнеңдер башҡалар араһында тотҡан урыны, иҫәпкә алыныуы. *[Миңлебай — әсәһенә:] Өйҙө ҡыйыҡлап ябып, кеше рәтенә индерәм тиһәң, һин һәр ваҡыт ҡаршы тораһың.* Т. Йәнәби. *Исмаһам, күршең бай, кеше рәтенән һанарлыҡ кешенән булһа, әллә йәнең дә тынысланыр ине.* Т. Хәйбуллин.

**6.** *күсм.* Нимәнеңдер ыңғайы, уңайы, эшләнер ваҡыты. *Һүҙ рәтендә бер һүҙ әйтәм, туҡтағыҙ, ситкә сыҡты был йүләр тип һүкмәгеҙ.* Ш. Бабич.

**7.** *күсм.* Нимәнеңдер йүнле, уңайлы, файҙаһы тейерлек яғы. *Нигмәт, һин китәһең китеүен дә [эш эҙләп], рәт булырмы икән унда ла?* М. Ғафури. **Рәт сығарыу** эшкә ярарҙай берәй нәмә булдырыу, барлыҡҡа килтереү. *Ниндәй генә көслө булма, рәт сығара алмаҫһың .. Ҡарттар менән кәңәштә тор, халыҡ тауышына ҡолаҡ һал.* Ә. Вахитов. **Рәт сығыу** эшкә ярарҙай берәй нәмә эшләй алыу. *Мулла, кем, Кашшаф Паша, .. сыҡманы рәт, бер ҡарыш юл атлай алманың йәки.* Ш. Бабич. / Ниндәйҙер мөмкинлек, эшләрлек хәл. *Рәтең бармы?* ■ *[Наилә:] Хәсрәтемдән иҫәүәнләнеп, янымдағы аксамды ла алдырҙым. Бер ҡайҙа ла барыр рәтем юҡ.* Ғ. Ибраһимов. *Аҙна түҙҙем артабан рәтем ҡалманы, Өфөгә больницаға киттем.* Д. Исламов.

**8.** *мат.* Билдәле бер тәртиптә урынлашҡан дәүмәлдәр теҙеме. *Геометрик рәт.* / *хим.* Һәр береһе үҙенән алдағы һәм арттағы ҡушылма

менән үҙ-ара мөнәсәбәттә торған теҙем. *Радиоактив рәт. Уран рәте.*

♦ **Рәт ауырыуы** *кар.* **киҙеү**[2]. **Әҙәм** (*йәки* **кеше) рәтенә инеү** яйға, йүнгә килеү.

● *Кәҙә һуйыуҙың да рәте бар.* Әйтем.

**РӘТ**[2] *и.* Һан менән килеп, эш-хәлдең ҡабатланыуын белдерә; тапҡыр, ҡабат. *Надя бер нисә рәт тайып китте.* С. Агиш.

♦ **Бер рәт** бер ваҡыт; бер мәл.

**РӘТКӘ** *р.* **1.** Ыңғайға, яйға. *[Ямал:] Уларҙың бисәләре беҙҙең рәткә ток яман ултырһа, беҙ эшләгәндән ауыҙ ҡыйшайтып көлөп тормаҫтар ине.* М. Тажи.

**2.** Йыш ҡына, күп кенә. *Һеләүһен хәҙер рәткә күренә.*

**РӘТЛЕ** *с.* **1.** Нисәлер рәттән[1] (**1**, 2 мәғ.) торған *Колхоз дүрт рәтле һыйыр һарайы һалған. Ун ике рәтле кино залы.*

**2.** *күсм.* Йүнле, һәйбәт (кешегә ҡарата). *Рәтле генә кеше. // Рәтле генә күренә.* ■ *Шәүәли .. рәтле булһа, атаһы ҡайһылай ҙа бер сараһын күреп, һалдаттан ҡалдырыр ине.* Б. Бикбай.

**3.** *күсм.* Аҡыллы, төплө (һүҙ, фекер һ. б. тура һында); йүнле. *Рәтле һүҙ ишетмәнем. // Рәтле генә һөйләшеү.*

**4.** *күсм.* Ҡәнәғәт булырлыҡ, йүнле, һәйбәт. *Рәтле аш. Бер рәтле күпер һалынмаған. // Рәтле йоҡламау. Рәтле эшләмәү.* ■ *Ун көнгә яҡын эш эҙләп караһаҡ та, тамаҡ туйҙырырлыҡ рәтле эш таба алманыҡ.* Т. Йәнәби. *[Илдар:] Участка агрономынан рәтле ярҙам ала алманым.* Ғ. Әхмәтшин. **Әҙәм рәтле** 1) башҡалар һымаҡ, ҡәҙимгесә. *Ҡадир туй яҡынайғанлыҡтан, уны әҙәм рәтләрәк үткәреү өсөн акса әҙерләү хәстәренә керешкәйне.* Б. Бикбай; 2) ҡәнәғәт булырлыҡ яҡшы, йүнле. *Әҙәм рәтле кейем.* ■ *Оморҙаҡ Урал буйлап күп ерҙәрҙе үткән, әммә бер әҙәм рәтле эш тапмаған* (Әкиәттән).

**РӘТЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Билдәле тәртип менән урынлашыу. *Донъялар рәтләнде инде хәҙер.* / Өҫ-баш тәртипкә килеү. *Уның таралмаған, рәтләнмәгән мыйығы өҫтөндә тәмәке төтөндәре бар ине.* Д. Юлтый.

**2.** Яйға килеү, көйләнеү; төҙөкләнеү, йүнләнеү (эш һ. б. ҡарата). *Инде генә тормош рәтләнде тигәс, һуғышы сыкты.* К. Кинйәбулатова.

**3.** Яҡшыға китеү, һәйбәтләнеү; төҙәлеү, йүнәлеү (тормош-көнкүрешкә ҡарата). *Совет булды, шулай ҙа рәтләнеүе ҡыйын булды. Алты йыл ауыл көтөүен көттөм.* А. Таһиров.

**4.** Һаулыҡ яҡшыртыу, һәйбәтләнеү. *Рәтләнеп алыу. Рәтләнә төшөү.* ■ *Тора-бара бөтөнләй рәтләнеп етһә, унан [Фәхриҙән] тау емереп эшләр колхозсы сығыр.* Б. Бикбай. / Хәл кереү, хәлләнеү. *Ҡуҡтә өйрәктәр күренгәс, хәлләнә дуҫ, рәтләнә.* Ш. Бабич.

**РӘТЛӘП** *р.* **1.** Рәте-рәте менән, рәт-рәт итеп. *Рәтләп ултырыу.* ■ *Барыһы ла рәтләп теҙеп ҡуйған эскәмйәләргә теҙелешеп ултырған.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Иплe итеп, иплән; йүнләп. *Ерҙе рәтләп эшкәртеү. Рәтләп, аңлатып һөйләү.* ■ *[Гәрәй — Шәүәлигә:] Рәтләп һөйләш! Ағайыңды әле танымаһаң, танытырмын мин!* Б. Бикбай.

**3.** Кәрәгенсә, йүнләп. *Һыу килтерһәләр ҙә, рәтләп эсә алманы.* М. Ғафури.

**РӘТЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. кар.* **рәтләү** 2, 3.

**РӘТЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Билдәле бер тәртиптә урынлаштырыу. *Рәтләп теҙеү. Рәтләп урынлаштырыу. Рәтләп һалыу.* / Өҫ-башты тәртипкә килтереү, йүнәтеү. *Йәнтимер өҫ-башын рәтләне, үҙ байлығында булғаны менән ҡупшыланды.* С. Агиш. *Разия апай .. туҙғып сыҡкан сәстәрен яулығы аҫтына рәтләп ҡыҫтырҙы.* Н. Мусин.

**2.** Ниндәйҙер эшкә яраҡлы итеп төҙәтеү, файҙаланырлыҡ хәлгә килтереү, йүнәтеү. *Арбаны рәтләү. Өйҙө рәтләү.* ■ *Мөхәмәтулла бабай килә лә ҡолаған ситәнде рәтләй йә орсоғонан төшкән ҡапҡаны йүнәтә башлай.* Ә. Вахитов.

**3.** Яйға килтереү, көйләү; төҙөкләү, йүнләү (эште һ. б.). *Мин бер ҙә иҫ китмәйенсә, туп-тура арбаға үк менеп киттем һәм бик асыҡ йөҙ менән: Һин эште рәтләгәнһең икән! — тинем.* С. Агиш.

**4.** Насарҙы йәки бер төрлөнө, яҡшыртыу, һәйбәтләү; төҙәтеү, йүнәтеү (тормош, көнкүреште). *Гариҙаны яҙыусылар ашлыҡ уңмағанын күрһәтәләр. Был дөрөҫ .. Беҙҙең тәжрибәбеҙ булманы, .. ерҙе эшкәртә белмәнек. Ләкин уныһын алдағы йыл рәтләрбеҙ.* Б. Бикбай.

**5.** Төрлө әмәлен күреп, бар итеү; йүнләү. *Тиҙ генә ашарға рәтләү.* ■ *Күҙгә тиклем эшләп бер аҙ акса рәтләгәс, күҙ көнө .. Троицкиға китергә булдым.* М. Ғафури.

**РӘТЛӘШЕҮ** *ҡ. урт. ярҙамл. кар.* **рәтләү.**

**РӘТЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ.* Тегеләй-былай итеп йүнәтеү; төҙәтештереү. *[Хәсби:] Ауылдың ҡарт-ҡоролары килеп, өйөмдө рәтләштерә һалды.* Б. Бикбай.

**РӘТ-СИРАТ** *и.*, **рәт тә сират та** Тейешле тәртип (юҡлыҡ мәғәнәһендә, бола йәки мәғәнәһеҙ эш-хәлгә ҡарата әйтелә). *Эшенең рәте-сираты юҡ.* ■ *Рәт тә, сират та юҡ, кемдең нимәгә көсө етә — шуны алып китә.* Б. Бикбай.

**РӘТТӘН** *р.* **1.** Рәт[1] (**1**, 2 мәғ.) итеп, рәт булып. *Рәттән теҙелеп киткән бер төҫлө өйҙәр.* / Бер рәт булып; эргәләш. *Рәттән ултырыу.* ■ *Байҙың уң яҡ эргәһендә ҡатыны Ольга баҫкан, уның рәтенән семьялары теҙелгән.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Бер-бер артлы, эргәләш; бергә. *Күргәҙмәлә ауылдың атлылары, атһыҙҙары, .. маллылары, малһыҙҙары рәттән ҡуйып яҙыла бара.* Ғ. Дәүләтшин. / Бер-бер артлы, бергә, бер ыңғай. *Рәттән уҡыу.*

**3.** Бер туҡтауһыҙ, өҙлөкһөҙ. *Ике көн рәттән ямғыр яуҙы.* ■ *Әмирханов менән Хәйруллин өс көн рәттән аҡайып, миңә өндәшмәй йөрөнөләр.* С. Агиш.

**РӘТҺЕҘ** *с.* **1.** Тәртип урынлашмаған, тәртипкә һалынмаған; тәртипһеҙ, буталсыҡ. *Рәтһеҙ исемлек. Рәтһеҙ өйҙәр.*

**2.** Йүнһеҙ, насар; ыңғай түгел (кешегә ҡарата). *Рәтһеҙ кеше. // Рәтһеҙ ҡыланыу. Рәтһеҙ һөйләшеү.* ■ *Балалар бигерәк рәтһеҙ йөрөйҙәр, тәләһә ниндәй урында акса тотоноуҙан тартынмайҙар.* М. Ғафури.

**3.** Уйланып етмәгән; аҡылһыҙ, мәғәнәһеҙ, йүнһеҙ (һүҙ, фекергә ҡарата). *Төндә Саша әллә*

*ниндәй рәтһеҙ төштәр күреп бөттө.* Ә. Бикчәнтәев.

**РӘТҺЕҘЛЕК** *и.* Рәтһеҙ (2 мәғ.) ҡыланыш. *Рәтһеҙлек күрһәтеү.*

**РӘТҺЕҘЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Ауырлашыу, насарайыу. *Уҡыуҙар рәтһеҙләнде. Эштәр рәтһеҙләнде.*

**2.** Йүнһеҙгә, мәғәнәһеҙгә әйләнеү. *Бигерәк рәтһеҙләнеп киткән.*

**РӘТ-ӘМӘЛ** *и. йыйн.* Ниҙер эшләрлек көс-хәл; мөмкинлек. *Бахыр килендең ҡунаҡҡа барырлыҡ та рәт-әмәле булмаған* (Әкиәттән).

**РӘУА** *[фарс.] с. иҫк. кит.* **1.** Яраҡлы, килешле. *Һуҙе рәуа булмаҫ.*

**2.** Үҙ ыңғайына, үҙ ағышына барған.

● *Алтмышка еткәс — рәуа йән.* Мәҡәл.

**РӘУАН** *[фарс.] с. иҫк. кит.* Барған, китеп барған, хәрәкәттәге. *Был ауылдың янынан китте Һамар юлы рәуан.* С. Яҡшығолов.

□ **Рәуан булыу** 1) ҡайҙалыр барыу; сығып китеү, йүнәлеү. *Нәгимдең әсәһе лә иртәгә гәйет тигән көндө .. юлга рәуан булған ине.* Й. Солтанов; 2) ағыу.

**РӘҮЕНКЕ** *с. диал.* Кәүек.

**РӘҮЕШ**[1] *и.* **1.** Кемдең йәки ниҙеңдер тышҡы булмышы, тышҡы ҡиәфәте, күренеше. *Башҡортостан үҙенең карталагы рәүеше менән кеше йөрәген хәтерләтә.* Ә. Харисов. *Башта ул [йырсы] ниңәлер һөйкөмһөҙ күренде. Иң элек тышҡы рәүеше оҡшамаңы.* Р. Солтангәрәев. *Кубәләк кеүек рәүеш менән китте фырлап, елпенеп.* Ш. Бабич.

**2.** Эштең башҡарылыу формаһы, характеры. *Йырлау рәүеше. Һөйләшеү рәүеше.*

**3.** У.-в. клш аффикстары менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*кар.* **рәүешендә, рәүештә**).

□ **Рәүеш итеү** оҡшатыу. *Шуның улы тип рәүеш иттем.*

◆ **Рәүешен килтереү** шартына килтереү, килештереү. *Һуҙ һөйләү тиһәң, рәүешен килтерә инде.*

**РӘҮЕШ**[2] *и. грам.* Ҡылым менән сифатты билдәләп, аныҡлап килгән морфологик яҡтан үҙгәрмәй торған һүҙ төркөмө. *Тамыр рәүеш. Яһалма рәүеш. Рәүеш дәрәжәләре.*

**РӘҮЕШЕНДӘ** *бәйл. функцияһында* Төп килештәге исемдәрҙән һуң килеп, кем йәки нимәлер һымаҡ, кем йәки нимәгәлер оҡшаш, яҡын булғанлыҡты белдереп оҡшатыу, сағыштырыу рәүеше яһай. *Бойороҡ рәүешендә күрһәтмә биреү. Яуап рәүешендә әйтелгән һүҙ.* ■ *Таминко экиәт рәүешендә киләсәк эштәр тураһында һөйләргә тотонҙо.* Д. Юлтый.

**РӘҮЕШЛЕ** *бәйл.* Төп килештәге исемдәрҙән һуң килеп, һыны, ҡиәфәте менән кем йәки нимәгәлер оҡшаш булғанлыҡты белдереп **төп** сифат яһай. *Буре рәүешле эт. Кеше рәүешле маймыл.*

◆ **Был рәүешле** был тиклем; былай, былдай. *Был рәүешле матурҙыр тип белмәгәйнем.* **Ни рәүешле** нисек; ҡалай. *[Хәйруллиндың] күҙ ситтәре әллә ни рәүешле ҡыҙарып тора.* С. Агиш. **Ошо рәүешле** ошолай; ошондай. *Үҫеп өлгөрмәгән бойҙайҙың «яҙмышын» ошо рәүешле хәл итеп ҡайттылар.* Т. Йәнәби. **Шул рәүешле** 1) шулай итеп, шулай. *Шул рәүешле үҙҙәре лә һиҙмәҫтән мул тормошка инеп киткәндәр.* С. Агиш; 2) шул тиклем, бик ныҡ. *Шул рәүешле боҙоҡ кеше булыр икән.* **Әҙәм рәүешле** әҙәмсә. *Әҙәм рәүешле кейем. Әҙәм рәүешле донъя көтөү.*

**РӘҮЕШЛӘҮ** *ҡ. диал.* Оҡшатыу.

**РӘҮЕШСӘ:** **шул рәүешсә** *шул уҡ* **шул рәүешле** (*кар.* **рәүешле**). *Бына шул рәүешсә, фольклор синфи көрәш, синфи тәрбиә ҡоралы булып хеҙмәт иткән.* Ғ. Амантай.

**РӘҮЕШТӘ** *бәйл. функцияһында* Сифат һәм *-ған* формаһындағы сифат ҡылымдарҙан һуң килеп, эш-хәлдең нисек башҡарылғанын белдерә. *Аңлы рәүештә. Аптыраған рәүештә. Ашығыс рәүештә китеп барыу. Ойошкан рәүештә эш башлау.* ■ *Ҡыйыуһыҙ рәүештә уға [Әмирханова] табан атланым.* С. Агиш.

**РӘҮЕШҺЕҘ** *с. һир.* Тышҡы ҡиәфәте йәмһеҙ, килешһеҙ; күрмәлекһеҙ. *Рәүешһеҙ кеше. Рәүешһеҙ булыу.*

**РӘУИЗ** [*рус.* ревизия ‹ *лат.*] *и. һөйл.* 18 быутта һәм 19 быуаттың беренсе яртыһында Россияла халыҡтың һанын билдәләү һәм йән башына яһаҡ һалыу өсөн үткәрелгән иҫәп. *Ҡағыҙга төшмәгәндәргә рәуиз ваҡытында ер эләкмәгән.* К. Мәргән.

**РӘҮКӘ** *с.* **1.** Үҫеп ултырған ерҙән серей башлаған (ағаска ҡарата).

**2.** *диал. кар.* **кәүек** 2.

**РӘҮКӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Үҙәгенән сереү (үҫеп ултырған ағасҡа ҡарата). *Рәүкәләнгән агас.*

**РӘХИМ** [*гәр.*] *и.* **1.** Аяу, ҡыҙғаныу хисе тыуҙырған мөнәсәбәт; мәрхәмәтлек, шәфҡәт. *Хоҙай рәхименә ышаныуҙан бик уңышһыҙ ине еребеҙ.* С. Кулибай. *Дошман, ҡара бауыр, аяу көтмә, рәхим уйлама.* Т. Морат.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

◆ **Рәхим итегеҙ** 1) әҙәп, илтифат менән ниҙер тәҡдим иткәндә, нимәгәлер рөхсәт биргәндә әйтелә. *[Зыя, бинокльде һоноп:] Рәхим итегеҙ, бер минутҡа түгел.., бөтөнләй бүләк итергә лә мөмкин.* М. Тажи; 2) илтифат менән ҡайҙалыр саҡырғанда әйтелә. *[Магазин мөдире:] «Әйҙүк, иптәш редактор, рәхим итегеҙ»,— тип ҡаршы алды.* Б. Бикбай. **Рәхим итеп** берәй үтенес белдереп мөрәжәғәт иткәндә ҡулланыла. *Рәхим итеп, тыңлағыҙ инде һүҙемде.* **Рәхим ҡылыу** аяу, ҡыҙғаныу. *Һеҙҙән бүтән был ерҙе рәхим ҡылыр кешем юҡ* (Бәйеттән).

**РӘХИМЛЕ** *с.* Аяу, ҡыҙғаныу хисе булған, йомшаҡ тәбиғәтле; мәрхәмәтле, шәфҡәтле. *Рәхимле кеше. Рәхимле булыу.* ■ *Эй, ҡарт бабай! Яҡшы рәхимле ата! Лавалар ҙан беҙҙе тыуҙырҙың.* Б. Ишемғол.

**РӘХИМЛЕК** *и.* Аяу, ҡыҙғаныу хисе тыуҙырған мөнәсәбәт; шәфҡәт, рәхим. *Рәхимлек күрһәтеү.* ■ Мал хужалары *[Әбүбәкерҙең] өйҙә ҡалған балаларына рәхимлек күҙе менән ҡарамайҙар, бер тинлек ярҙам күрһәтмәйҙәр.* «Башҡорт легендалары», 1969.

**РӘХИМҺЕҘ** *с.* **1.** Аяу, ҡыҙғаныуҙы белмәҫ; мәрхәмәтһеҙ, шәфҡәтһеҙ. *Рәхимһеҙ кеше. Рәхимһеҙ һуғыш. Рәхимһеҙ булыу. Рәхимһеҙ рәү-*

*ештә. // Рәхимһеҙ ҡыланыу.* ■ *[Диңгеҙ] Юламан карттың бәләкәс кенә бәхетен дә .. рәхимһеҙ ҡулдары менән йолҡоп, өҙөп алды.* З. Биишева.

**2.** *р. мәғ.* Саманан тыш; бик аяуһыҙ. *Рәхимһеҙ ҙур. / Рәхимһеҙ һыуытыу.* ■ *Поездың йөрөшө рәхимһеҙ бит: бер нисә минут эсендә йәйәүеләрҙе бәйләгән кеүек артта ҡалдырып китте.* Д. Юлтый. *Төш етте. Ҡояш, түбә өҫтөнә баҫып, рәхимһеҙ ҡыҙҙырҙы.* З. Биишева.

**РӘХИМҺЕҘЛЕК** *и.* Рәхимһеҙ холоҡ, рәхимһеҙ ҡыланыш. *Рәхимһеҙлек күрһәтеү.*

**РӘХИМҺЕҘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Рәхимһеҙгә әйләнеү, үҙеңде рәхимһеҙ тотоу. *Торған һайын рәхимһеҙләнеү.*

**РӘХИМ-ШӘФҠӘТ** *и. йыйн.* Яҡшылыҡ, мәрхәмәтлек. *Рәхим-шәфҡәт күрһәтеү.* ■ *[Айыу:] Төлкө туғаныма берегеҙ ҙә теймәгеҙ! Тейер булһағыҙ, минән һеҙгә рәхим-шәфҡәт булмаҫ.* Ҡ. Даян.

**РӘХМӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Аяу, ҡыҙғаныу хисе; мәрхәмәт, шәфҡәт, рәхим. *Донъя шул был: бар уның рәхмәт яғы, зәхмәт яғы.* Ш. Бабич. *Ҡасан балҡыр икән ҡояш, сәсәр рәхмәт нурын беҙгә.* Т. Йәнәби. **Алланың рәхмәте киң** *ҡар.* **алла. Алланың рәхмәте менән** *ҡар.* **алла.**

**2.** Яҡшылыҡ күрһәткәнгә булған ҡәнәғәтлеҡ, ризалыҡ тойғоһо. *Рәхмәт һүҙе. Рәхмәт алыу. Рәхмәт ҡаҙаныу.* ■ *Был хәтле йомартлыҡҡа, хәстәрлеккә һөнәрсенең күңелендәге рәхмәттең иге-сиге булмай.* З. Биишева. *Урал батыр .. халыҡҡа баш эйеп, рәхмәт белдерҙе лә, мөгөҙҙәге һыуҙы уртланы, ти.* «Урал батыр». / Яҡшылыҡҡа яуап итеп әйтелә. *Рәхмәт әйтеү.* ■ *[Янһары:] Яҡты йөҙөңә, һый-хөрмәтеңә рәхмәт, ҡайным* (Әкиәттән). *[Батша:] Бындай күлдәкте мин гүмер ҙә кейгәнем юҡ ине. Рәхмәт, килен* (Әкиәттән). **Рәхмәт төшкөрө** кемгәлер рәхмәт тойғоһо белдергәндә әйтелә. **Рәхмәт уҡыу** ҙур рәхмәт белдереү, ихлас күңелдән рәхмәт әйтеү. *Егет әбейгә рәхмәт уҡып, ул өйрәткән юл менән киткән* (Әкиәттән). **Рәхмәт яуғыр** *ҡар.* **рәхмәт төшкөрө.**

**3.** Эштәге күрһәткескә, хеҙмәттәге уңыштарға рәсми ыңғай баһа. *Приказ менән рәхмәт белдереү. Рәхмәт алыу.*

**4.** Ниндәйҙер тәҡдимгә, элек ҡылынған насар эшкә яһалма ризалыҡ тойғоһо. *Рәхмәт мәрхәмәтегеҙгә. Мин уны һәр аҙым һайын ишетәм. Минең гәрип булыуыма үҙем гәйепле түгел.* Т. Хәйбуллин.

**РӘХМӘТЛЕ** *с.* **1.** Изгелекле, яҡшылыҡлы; шәфҡәтле, рәхимле. *Рәхмәтле тормош. Рәхмәтле яҙмыш.* ■ *Әй, Ғәли .. рәхмәтле ямғыр урынына боҙло ямғыр яуҙырһаң, ҡундырырбыҙ мороноңа.* Ш. Бабич.

**2.** Яҡшылыҡ эшләп, рәхмәт алған (кешегә ҡарата). *Рәхмәтле булыу.*

**РӘХМӘТЛӘНЕҮ** *ҡ.* Рәхмәт (2, 3 мәғ.) алыу.

**РӘХМӘТЛӘҮ** *ҡ.* Рәхмәттәр (2, 3 мәғ.) әйтеү, рәхмәт белдереү.

**РӘХӘТ** [1] [*ғәр.*] **1.** *и.* Мул, иркен тормош шарттары; йәшәү-эшләү өсөн кәрәк булған бөтә уңайлы шарттар, мөмкинлектәр. *Алдағы көн рәхәте өсөн тырышыу. Рәхәт күреү. Рәхәткә тарыу. Рәхәттә йәшәү.* ■ *Ауыл тын... Яҙ, йәй, көҙ буйы өҙлөкһөҙ эш эшләп арыған крәҫтиәндәр үҙҙәренең йыллыҡ хеҙмәттәре хаҡына ошо оҙон төндәрҙе алғандар ҙа, шуның икһеҙ-сикһеҙ рәхәтенә сумып йоҡоға талғандар.* Ғ. Дәүләтшин. *Алда рәхәт ҡәҙерен белмәккә михнәт файҙалы.* Ш. Бабич. *Үткән рәхәт иҫкә төшһә, ас үҙәктәр өҙөлә* (Халыҡ йырынан). **Донъя рәхәтен күреү** мул, етеш, бәхетле һәм шатлыҡлы тормошта йәшәү. *Билде бөгөп байға эшләнек, донъя рәхәткәйҙәрен күрмәнек* (Халыҡ йырынан).

**2.** *и.* Уңайлы, мул, тыныс шарттарҙа йәшәгәндән тыуған хуш, ҡәнәғәт һәм ләззәтле тойғо. *Буран да баҫылғас, бүреләрҙән дә ҡотолғас, йәнгә рәхәт булып китте.* Ғ. Ғүмәр. *Ҡайҙан белеп өлгөрҙөң һин, Зәйнәп, шундай хыял, семья рәхәтен.* Ғ. Сәләм. *Донъяның китте беҙҙән рәхәте, йөрәгемдә ҡалды һағыш йәрәхәте* (Бәйеттән).

**3.** *с.* Хуш, ҡәнәғәт тойғоло; ләззәтле. *Рәхәт донъя. Рәхәт тормош. Рәхәт көндәр. // Рәхәт йәшәү. Рәхәт гүмер итеү. // Ниндәй рәхәт.* ■ *Тәнгә рәхәт талғынлыҡ биреп һалҡынса ел иҫте.* Б. Бикбай. *Агиҙелкәйҙәрҙең ай һауаһы йәнгә рәхәт, тәнгә ҙур файҙа* (Халыҡ йырынан).

◆ **Рәхәтен күреү** кемдең, нимәнең изгелеген, яҡшылығын күреү. *Әсәйемдең бөтә хыялы .. килен рәхәтен күреү ине.* Д. Юлтый.

**РӘХӘТЛЕК** *и.* **1.** Рәхәт, тыныс, мул тормош. *Ҡарт кейәүендә Гөльямал рәхәтлек күрмәне. Ҡарттың элекке бисәһенән ҡалған күмәк балаһы тәрбиәләү өҫтөнә йорттағы бөтә ваҡ-төйәк эш уның өҫтөндә ине.* Б. Ишемғол.

**2.** Күңелгә хушлыҡ, ләззәт биргән тойғо; рәхәт. *Тормош рәхәтлеге.* ■ *Дала тынып ҡалды. Бөтә тирә-яҡҡа һалҡынса рәхәтлек таралды.* Х. Ғиләжев. *Фани донъя рәхәтлеге — байлыҡта ла түгел, һаулыҡта* (Халыҡ йырынан).

**РӘХӘТЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Рәхәтлек тойғоһо уятыу; кинәндереү, ләззәтләндереү. *Һалҡынса ел аҫтан, түбыктан йөрөй, иҙеү аша инеп, бөтә тәнде рәхәтләндерә.* С. Агиш. *[Ҡыҙ — егеткә:] Рәхмәт инде, егет, ҡотҡарҙың. Шуның өсөн әйҙә бер рәхәтләндереп йөрөтәйем әле* (Әкиәттән).

**РӘХӘТЛӘНЕҮ** *ҡ.* Рәхәтлек тойоу; кинәнеү, ләззәтләнеү. *Рәхәтләнеп ашау. Рәхәтләнеп йәшәү. Рәхәтләнеп йоҡлау. Рәхәтләнеп көлөү.* ■ *Ауыл кешеһе .. рәхәтләнеп тәмле йоҡоға талған.* Ғ. Дәүләтшин. *Йәш бәпкәләр менән рәхәтләнеп, йәш сирәмдә сәйран итерһең.* Ш. Бабич. *Ете батыр рәхәтләнеп балыҡ ашап ултыралар, ти* (Әкиәттән).

**РӘШӘ** [1] *и.*, **рәшә себене** *зоол.* Иткә йомортҡа һала торған эре күк себен. **Рәшә ҡорто** рәшә себененең йомортҡаһынан сыҡҡан ҡорт.

**РӘШӘ** [2] *и. ҡар.* **тут** 1, 2. *Арышҡа рәшә төшкән.*

**РӘШӘ** [3] *и.* **1.** Эҫелә ерҙән күтәрелгән төтөн һымаҡ йылы пар; монар. *Ағас баштарына йәйелгән күкшел зәңгәр рәшә тағы ҡуйылана, томанлана төштө.* К. Мәргән.

**2.** Һауаның төрлө дәрәжәлә йылынып томанланыуы арҡаһында горизонтта күренмәгән нәмәләрҙең һауала сағылыу күренеше.

◆ **Рәшә уйнау** (*йәки* **бейеү**) рәшә төшкән ваҡытта һауа тулҡынланып һелкенеп тороу.

*Ерем йылмая тип күҙәтәм сағылдарҙа рәшә бейеүен.* М. Ғәли.

**РӘШӘ** [4] *и. диал.* **1.** Рашкы. *Рәшә яуа.*

**2.** *кар.* **бәҫ** [2] 1. *Ағас баштарына рәшә ултырған.*

**РӘШӘТКӘ** [*рус.*] *и.* **1.** Таҡта йәки тимер менән арҡырыға араталап эшләнгән кәртә. *Ағас рәшәткә. Тимер рәшәткә. Баҡса рәшәткәһе.* ■ *Боролманан поезд килеп сыкты һәм ашыкмай ғына тимер юл күперенең рәшәткәләре эсенә инде.* Ә. Вәли. / Тәҙрәгә, ишеккә ҡуйылған селтәрле тимер. *Әмирханов тәҙрәгә тимер рәшәткә ҡуйып йөрөгән милиционерга күрһәтеп: — Ярҙамлаш! — тине.* С. Агиш. **Рәшәткә артына ултыртыу** төрмәгә ябыу.

**2.** Һауа инеү, көл төшөү өсөн мейес табаныың алғы өлөшөнә һалынған тимер; селтәр.

**РӘШӘТКӘЛЕ** *с.* Рәшәткә (1 мәғ.) менән уратылған, рәшәткә тотолған. *Рәшәткәле баҡса.* / Рәшәткә (1 мәғ.) ҡуйылған. *Рәшәткәле тәҙрә.*

**РӘШӘТКӘЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **рәшәткәләү.** *Рәшәткәләнгән баҡса.*

**РӘШӘТКӘЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **рәшәткәләү.**

**РӘШӘТКӘЛӘҮ** *к.* Рәшәткә (1 мәғ.) менән уратыу; кәртәләү. *Баҡсаны рәшәткәләү.* / Рәшәткәле итеү, рәшәткә (1 мәғ.) ҡуйыу. *Тәҙрәне рәшәткәләү.*

**РӘШӘТКӘЛӘШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **рәшәткәләү.**

**РЮКЗА́К** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. кар.* **артмаҡ** 2. *Беҙ, рюкзактар артмаҡлап, алыҫ юлдан килә инек.* Х. Түләкәев. *Геолог ҡыҙ!.. Рюкзағыңда ниңдәй таштар улар, ауыр түгелме һуң арҡаңда?* Р. Ғарипов.

**РЮ́МКА** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Иҫерткес эсемлек өсөн тәғәйенләнгән бәләкәй һауыт. *[Фәтхиә:] Туй булғас, туй һымаҡ булһын. Харис, тултыр рюмкаларҙы!* Ш. Янбаев.

**РЯДОВО́Й** [*рус.*] *с.* Командирҙар сафына инмәгән; ябай. *Рядовой һалдат. // Гвардия рядовойы.* ■ *[Комиссар:] Рядовойҙар кәрәгенән артып китте. Байтағын кире ҡайтарҙыҡ.* Ә. Ихсан.

**РЯ́СА** [*рус.*] *и.* Христиан руханиҙарының киң еңле, оҙон тар билле, өҫ кейеме.

# С

**С** [эс] Башҡорт алфавитының егерме дүртенсе хәрефе.

**СААМ** *и.* Россия-ла Кольский ярымутрауында, Норвегия, Швеция, Финляндияның төньяҡ райондарында йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (уғыр-фин телдәренең береһендә һөйләшә). *Саам халҡы. Саам ҡатыны. Саам теле.*

**САБА** [1] *и.* Ҡамсыға ҡуш итеп үрелгән тармаҡ; армыт. *[Кәйум] түбылғы һаплы, ике сабалы, төлкө ҡолаҡлы ун икенән үрелгән ҡамсы килтереп сығарҙы.* С. Агиш.

**САБА** [2] [*гәр.*] *и.*, **саба еле** Таңғы йомшаҡ талғын ел; зефир. *Йомшаҡ саба елдәрең менән изге солох хәбәрҙәрен килтер! Һуғыш, туҡта!* Ш. Фидаи.

**САБАҠ** [1] *и.* Һаҙандар ғаиләһенә ҡараған күкһел һыртлы, аҡ ҡорһаҡлы, буҙ ҡойроҡло ваҡ йылға балығы. ■ *Яр буйына йыйылған ваҡ сабаҡтар, һыуҙың өҫтөн зымбырлатып, тирә-яҡҡа һирпелде.* Н. Мусин.

♦ **Диңгеҙ сабағы** йылға сабағына оҡшағаны-раҡ диңгеҙ балығы (ҡаҡлап ашайҙар). **Йоҡа сабаҡ** *диал.* күкйөн.

**САБАҠ** [2] *и. диал.* Арата. *Ҡапҡа сабағы.* ■ *Егеттәр тәгәрмәстәре һурып ташланған, сабаҡтары ҡойолоп бөткән арбаның үрәсәһенә барып ултырҙылар.* Һ. Дәүләтшина.

**САБАҠЫ** *и. диал.* Сыпҡай өйрәк (*кар.* **өйрәк**).

**САБАН** *с.* **1.** Ялҡау тәбиғәтле, яй йөрөүсән (атҡа ҡарата). *[Ҡотләхмәт:] Ана теге сабан туры бейәгә айырыуса әһәмиәт бирегеҙ, бик үк мантып етмәй.* Ф. Иҫәнғолов. *Сабан атты сыбыртҡылап ҡыуып, күрше ауылға китеп баралар.* М. Хәй.

**2.** *диал.* Ығыш. *Дөрөҫ, була ҡасан арала, сабан, сарға алабармандар, .. юҡҡа ғына мыжып баргандар.* Ғ. Сәләм.

**САБАР** [1] *и. тар.* Батша, хан һарайын ҡараууллаған ҡораллы һыбай һаҡсы. *Әбелхәйер хандың тирмәһен ҡарауыллаған сабарҙар ҙа аттарын билбауҙарына бәйләп .. йоҡлай* (Хикәйәттән).

**САБАР** [2] *и.* Сабарман, сапҡын. *Арыҫландың сабарҙары ниндәй хәбәр килтерер бит әле.* Ғ. Ибраһимов. *Сәлим түрә уҫал юл һайлай, үҙенең сабарҙарынан .. нөгөр туплап, оҫта рәүештә Йомағолдо үлтереү юлына күсә* (Хикәйәттән).

**САБАРМАН** *и.* Ашығыс хәбәр менән алыҫ юлға саба торған һыбай йомошсо; сапҡын, сабар. *Ауылдың бай ҡазаҡтары сабарман ебәреп, был турала .. аҡтарға хәбәр итте.* Б. Хәсән.

**САБАТА** *и.* Ҡата рәүешендәрәк итеп, сей йүкәнән үргән аяҡ кейеме (силғау йәки тула ойоҡ менән кейелә). *Сабата ҡалыбы. Сабата бауы. Сабата үреү.* ■ *Беҙҙең тирәләге башҡорттар сабата кейә. Минең атайым бик матур, ныҡ итеп сабата үрә белә ине.* Т. Йәнәби. *Йырлай-йырлай сабатаға йүкә һуялар.* Ғ. Мәсғүт. **Башмаҡ сабата** тәрән итеп үрелгән бауһыҙ сабата. *Фәүзиә .. аяғына башмаҡ сабатаһын эләктереп, һоҫҡо тотоп, күршеләргә йүгерҙе.* И. Ғиззәтуллин. **Урыҫ сабатаһы** ялпаҡ башлы ҡалын сабата.

♦ **Көн уҙһын, сабата туҙһын** ялҡау, арамъя кешегә ҡарата әйтелә. *Ҡайһы берәүҙәр күҙ буяр өсөн колхозға инеп, көн уҙһын, сабата туҙһын, тип, коро исем булып йөрөй.* М. Тажи. **Сабатаны түргә элеү** үрләп алғас, маһайып, һауаланып китеү. *[Моратша:] Түрә булып, сабатаһын түргә элеүе шул булғандыр инде. Уның күрһәткәне етерлек булды.* Т. Хәйбуллин. **Сабата типкес** *кар.* **сәсрәтмә. Сабата туҙҙырыу** буш менән йөрөү. *[Шаһнияз:] Дәүләтовтарҙың атаһы ла, улы ла һыр бирмәгән. Был донъяла юҡҡа ғына сабата туҙҙырмағанбыҙ.* Ә. Мирзаһитов.

**САБАТАЛЫ** *с.* Сабата кейгән. *Палубала түбәтәйле, сабаталы малай бара.* М. Кәрим.

**САБАТАСЫ** *и.* Сабата үреүсе. *Сабатасы инең, йүкә еҫе килә кеүек әле лә ҡулынан.* Р. Шаммасов.

**САБАУЫЛ** *и. диал. ҡар.* **сапҡын**[3]. *Беҙҙең өҫкә сабауыл яһауҙан туҡтамайҙар. Гел ҡыйралабыҙ. гел таланабыҙ.* Ғ. Ибраһимов.

**САБАУЫЛЛАУ** *ҡ.* Бер тегеләй, бер былай сабып, сәбәләнеп йөрөү. *Атайым ат тугарган арала мин оло юл сатында сабауыллап йөрөгән ҙур бер ҡыҙғылт этте күреп ҡалдым.* С. Кулибай. *Барс кеше еҫен һиҙһә, унда һикереп, бында һикереп сабауыллап йөрөй башлай.* „Бабсаҡ менән Күсәк".

**САБАХ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Иртәнге мәл; таң. *Әҫәрләнеп сабах нуры илә, һайрай башлар һәр ҡош.* С. Яҡшығолов. **Хәйерле сабах** иртән осрашҡанда әйтелгән сәләмләү һүҙе; хәйерле иртә.— *Хәйерле сабах, Усман әфәнде! — тигән һүҙҙәремә ул сырайын гына һытып ҡуйҙы.* Ғ. Ғүмәр.

**САБИҠ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Әүәлге, элекке. *Екатеринбург күптән үк беҙҙең .. хәҙерге Тамъян — Ҡытай кантонын,.. сабиҡ Күҙәй кантонын, хәҙерге Мәсәғүт, Арғаяш кантондарының Силәбегә ингән волостарын һорай.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**САБИТ** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* **1.** Ныҡлы, ҡаҡшамаҫ. *Сабит һүҙ. Сабит ҡарар.*

**2.** Шикһеҙ, ышаныслы; асыҡ. *Бәни Исраилдарҙың самири яһаған быҙауға табыныуҙары .. тарих менән сабиттыр.* М. Ғафури.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**САБОТА́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Эшкә зыян килтереү маҡсатында ҡушылғанды үтәмәү йәки юрамал түбән кимәлдә башҡарыу күренеше. *Ярлылар эшләгән һәр нәмәгә [байҙар] аяҡ сала, .. саботаж яһай.* Я. Хамматов.

**2.** Нимәнелер булдырмаҫ өсөн аҫтыртын алып барылған эш. *Ауыл хужалығын коллективлаштырыуға ҡаршы ҡулаҡтар саботажы.*

**САБОТАЖСЫ** *и.* Саботаж яһаусы, саботаж менән шөғөлләнеүсе.

**САБУР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Алой.

**САБЫЙ** [*ғәр.*] *и.* Йәш бала, бәләкәй бала; бәпес.// *Сабый саҡ. Сабый бала.* ■ *Мөйөшкә сәңгелдәк эленгән. Унда тумалаҡ алһыу битле, тулы кәүҙәле сабый йоҡлап ята.* Ф. Иҫәнғолов. / Тәжрибәһеҙ кешегә ҡарата әйтелә. *Таһири — таһир тиҙәр, исеме Һаҙый — һади тиҙәр, мәғлүмәтте артҡа һалған бер сабый абый, тиҙәр.* Ш. Бабич.

♦ **Һаҡаллы сабый** бала һымаҡ холоҡло оло кешегә ҡарата әйтелә. *Кескәй Хосе ла, һаҡаллы сабый Коно ла командирҙың ҡаты әмерен иштмәне.* Ә. Бикчәнтәев.

● *Етмештәге лә сабый, етеләге лә сабый.* Әйтем.

**САБЫЙЛЫҠ** *и.* **1.** Сабый саҡ; балалыҡ. *Сабыйлыҡ үтте. Емеш балиғ булды.* З. Биишева. *Һандыҡ төбөндәге һарғылт хаттар, эленеп торған һарғылт һүрәттәр... Сабыйлыҡта күҙҙәремә ҡарап, сабырлыҡҡа улар өйрәткән.* Р. Бикбаев.

**2.** Сабыйҙарға хас сифат. *Тимашев бик йәш,* .. *тауышы нәҙек, биттәре саф, күҙҙәре сабыйлыҡтан да сығып бөтмәгән.* Д. Юлтый.

**САБЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **сабыу**[4] 1, 2, 5. *Балта менән сабылған ағас. Сабылған бесән.* ■ *Үләне сабылған яландарҙа .. ҡурпы үҫте.* Я. Хамматов.

**САБЫМ** *и.* Сабылған бесән. *Йыллыҡ сабым. Быйылғы сабым яҡшы булды.*

**САБЫН** *и.* Бесән саба торған ер, сабынлыҡ. *Сабын бүлеү.* ■ *Ҡырлас тауҙа .. сабылмай ятҡан сабын бар. Шунда сығып, бесән саба тор.* И. Көҫәнҡол. *Ике генә егет бесән саба тугай буйҙарында сабында* (Халыҡ йырынан).

**САБЫНДЫ** *и. диал.* Төҙөлөш һәм юл эштәрендә ҡулланыла торған ярсыҡ таш.

**САБЫНДЫРЫУ** *ҡ.* Кемделер мунсала миндек менән сабыу. *Ҡыҙ әбейҙе яҡшылап .. сабындыра, һәйбәтләп йыуындыра ла өйөнә алып ҡайта* (Әкиәттән).

♦ **Селек миндек менән сабындырыу** ныҡ итеп әрләү, тәнҡитләү. *Мин ишетеп ултырам. Имеш, Хафиз ағай председателде мунса төшөрә, селек миндек менән сабындыра. Ә һуң мин төшкән мунсаның ялҡыны һеҙгә лә теймәйме ни?* М. Тажи.

**САБЫНЛЫҠ** *и.* Бесән саба торған ер; сабын. *Тәбиғи сабынлыҡ. Һуғарыулы сабынлыҡ.* ■ *[Ҡолморҙа — Алтын байға:] Йылҡыларҙы Бағры йылғаһының тамағына, Әрәтәү сабынлығына, үләндең яҡшы еренә алып бар. Ошо араларҙа бейәләрҙең һөтө кәмей башланы.* Т. Хәйбуллин.

**САБЫНЫУ** *ҡ.* Үҙ-үҙеңде мунсала миндек менән сабыу. *Ҡәйүм ҡарт көнгә биш мунса инергә лә ҡаршы түгел, бөгөн дә рәхәтләнеп сабынды.* С. Агиш. *Сабыныу ҡан йөрөшөн, матдәләрҙең алмашыныуын шәбәйтә, һөйәк-быуындарҙы йомшарта.* В. Ғүмәров.

**САБЫР** [*ғәр.*] **1.** *и.* Ҡыйынлыҡҡа түҙеү, сыҙау һәләтлеге; сыҙамлыҡ, түҙемлек. *Сабыр бөтөү. Сабыры етмәй.* ■ *Бар хыялдан, ярһыуҙарҙан мәңге йәшеренмәк булам, мәңгегә сабырым менән күңелемә баш булмаҡ булам.* Ш. Бабич. *Бишенсе ҡиммәт нәмә сабыр тигән, сабыр кеше моратын табыр тигән.* Аҡмулла. **Сабыр йәмил** *иҫк.* ныҡлы, күркәм сабырлыҡ, бирешмәүсәнлек. *Ауыр хәсрәт менән туктек беҙ күҙ йәше, хаҡ тәғәлә сабыр йәмил бирһен инде* (Бәйеттән).

**2.** *с.* Ҡыйын булған төрлө хәлгә түҙеүсән, ярһып, ҡыҙып бармаусан; тыныс, түҙемле. *Сабыр кеше. Сабыр булыу. // Сабыр ҡыланыу.* ■ *Ғорур һәм сыҙам тол ҡатын образы бар киәфәте, тәүҙә һағышлы матурлығы, аҙаҡ сабыр батырлығы менән күҙ алдында тора.* Ғ. Хөсәйенов. *Гөлниса сабыр тәбиғәтле, юҡ-барға янып көйөп бармай.* Ғ. Шәрипов. *Аҡыл, фекер камиллаша күргән менән, сабыр йәшәп, үҙең татып белгән менән.* Ҡ. Даян.

● *Сабыр төбө һары алтын.* Мәҡәл.

**САБЫРЛАНЫУ** *ҡ.* Сабырлыға әйләнеү, сабырлы булыу. *[Ҡайындың] тауышы шатлыҡ ҡына, һыҙғырмай ҙа, сабырланған.* И. Кинйәбулатов. *Һалҡын һыуҙар эсһәм генә, йөрәгем сабырлана* (Халыҡ йырынан).

**САБЫРЛЫ** *с.* Төрлө ҡыйын хәлгә түҙеүсән, ярһып, ҡыҙып бармаусан; тыныс, түҙемле. *Сабырлы кеше. Сабырлы булыу.* ■ *Янымда теге урта йәштәге врач: ул сабырлы йөҙ менән миңә ҡарап тора.* С. Кулибай. *Сабырһыҙ ҙа шайтан, сабырлы — солтан, сабырлыҡтар кәрәк һәр эштә* (Халыҡ йырынан).

● *Сабырлы сыҙар, сабырһыҙ илар.* Әйтем.

**САБЫРЛЫҠ** *и.* Ҡыйынлыҡҡа түҙеү, сыҙау һәләтлеге; түҙемлек. *Сабырлыҡ бөтөү. Сабырлыҡҡа өйрәнеү.* ■ *Ыҙғыштарға аҙ һанлы, һағырак ҡылыҡлы ҡарьяндар ғына ҡыҫылмаған, .. башҡаларға һыйынып йәшәй алған. Шул да инде уларҙы сабырлыҡҡа өйрәткән.* Б. Бикбай. *Бисәләр: — Хоҙай үҙенә күркәм сабырлыҡ бирһен,— тип теләнеләр [Гөлйөҙөмдөң инәһенә].* Һ. Дәүләтшина. *Был хәлдәргә түҙер өсөн бирһен хоҙай сабырлыҡ* (Бәйеттән).

**САБЫРЛЫҠЛЫ** *с. кар.* **сабырлы.** *Сабырлыҡлы кеше. Үҙеңдә сабырлыҡлы тотоу.*

**САБЫРТ** *и. кар.* **самыт.** *Сабырт менән эшләү.*

**САБЫРТҠЫ** *и.* Һалҡын тейеүҙән ауыҙ-моронға ҡыҙарып ҡабарып сыҡҡан һыулы ҡыуыҡса. *Иренгә сабыртҡы сыҡҡан.*

**САБЫРТҠЫЛАУ** *к.* Сабыртҡылы булыу, сабыртҡы сығыу. *Ирене сабыртҡылаған.*

**САБЫРТМА** *и.* Нимәлер тәьҫирендә йәки ниндәйҙер бер сир һөҙөмтәһендә тәнгә ҡыҙарып ҡалҡҡан ваҡ ҡына һыулы ҡыуыҡса. *Эренле сабыртма. Тәнде сабыртма баҫҡан.*

**САБЫРТМАЛЫ: сабыртмалы тиф** бет менән тарала торған бик йоғошло ауырыу.

**САБЫРТЫУ** *к.* Тәнгә сабыртма сығыу, ҡалҡыу. *Билсәндән Сәгиҙәнең беләктәре ҡып-ҡыҙыл булып сабыртып сыҡты.* М. Тажи. *1921 йылғы аслыҡта .. ҡырлығурай йыйғанда беләктәр ҡалмай, ашаған да ауыҙ тирәләре сабыртып сыға ине.* Ш. Насыров.

**САБЫРҺЫҘ** *с.* Төрлө ҡыйын хәлгә сыҙамһыҙ; түҙемһеҙ. *Сабырһыҙ кеше. Сабырһыҙ булыу. // Сабырһыҙ ҡыланыу.* ■ *Малы ла булыр, һаны ла булыр, булмайыҡ үҙебеҙ сабырһыҙ* (Халыҡ йырынан).

**САБЫРҺЫҘЛАНЫУ** *к.* Сабырһыҙлыҡ күрһәтеү, сабырһыҙ ҡыланыу; түҙемһеҙләнеү. *Ғаббас мулла .. теге һылыу ҡатындың килгәнен сабырһыҙланып көттө.* З. Биишева. *Әсәһенең бушауын көтөп алып, Хисмәтулла сабырһыҙланып һораны: — Ауылда ниндәй яңылыҡтар бар?* Я. Хамматов.

**САБЫРҺЫҘЛЫҠ** *и.* Сабыр, түҙем юҡлыҡ; түҙемһеҙлек. *Сабырһыҙлыҡ күрһәтеү. Сабырһыҙлыҡ менән көтөү.* ■ *Ул [Таминко] минең сабырһыҙлыҡты һиҙеп: „Тыныс бул!“ — тине. Беҙ тағы ла тындыҡ.* Д. Юлтый.

**САБЫУ** [1] *и.* **1.** Ҡаптырмалы өҫкө кейемдең билдән түбән алғы өлөшө, асылып ябылмалы итәге; салғый. *Бишмәт сабыуы. Сабыуҙы билгә ҡыҫтырыу.* ■ *[Ел] ярты сәғәт самаһы юлсыларҙың баштарындағы бүректәрен осороп, итәк сабыуҙарынан тартҡылап шаярғандан һуң әллә ҡайҙа китеп юғалды.* Ш. Шәһәр.

**2.** *диал.* Итәк. *Ҡатын-ҡыҙҙың өҫтөндә сабыуы, яғаһы семәрле һырма көпө.* С. Кулибай.

**3.** *диал. кар.* **ҡыйыҡ** [3]. *Сабыу индереп тегеү.*

♦ **Сабыуҙы йыйып йөрөү** хаҡланып, алды-артты ҡарап, абай йөрөү. *[Хәйруллин — Салихҡа:] Ҡустым, бында [һатыу эшендә] сабыуыңды йыйып йөрө. Ҡайҙа был төргәктең эсендәге ҡағыҙы?* С. Агиш.

**САБЫУ** [2] (сап≠) *к.* **1.** Ҡуш аяҡлап һикереп, бик шәп барыу (йәнлек, хайуанға ҡарата). *Болан саба.* ■ *Берләм юлдан дөпөлдәп сабып төшкән ҡара айғырҙың тояҡ тауышы төнгө тынлыҡҡа сик ҡуйҙы.* Һ. Дәүләтшина.— *Юлбарс! — тип хужаһы ҡысҡырыуға, эт сабып барып ишек алдына уҡ инеп китте.* М. Тажи.

**2.** Атҡа менеп, бик шәп елдереү. *Ә кис .. бурыл ат өҫтөндә Йосоп сапты урман яғына.* Р. Ниғмәти. *Ҡуҙыйкүрпәс күк толпарҙың ҡылдарын өтөп ебәргәйне, толпар килеп тә баҫты, ти, .. ҡыҙ менән егет уға менеп алды ла сабып китеп тә барҙы ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**3.** Ат менеп ярышыу, уҙышыу. *Ун биш саҡырымдан сабабыҙ. Көн еләҫ. Саба торған юл һыртлап, ҡырлас буйлап килә.* Д. Юлтый. *Бәйгелә мин уның [Зөлкәрнәйҙең] атына менеп тә сапҡайным.* Н. Иҙелбай. **Ат сабыу** һыбай менеп ат ярыштырыу. *Ат сабыу өсөн ҡырпаҡ ҡарҙан да яҡшы ваҡыт юҡ.* Ғ. Дәүләтшин. *Урай ғына урай ат сабырға сәңгел ере кеүек ер ҡайҙа* (Халыҡ йырынан).

**4.** Бик етеҙ барыу, бик шәп хәрәкәт итеү. *Әнүәр артынан малайҙар ҙа сапты.* Р. Ғабдрахманов. *Төн ҡараһын ярып поезд саба.* Ғ. Амантай. // Йүгереп йөрөү. *[Көтөүсе] мал аҙ ғына ҡатарҙан сыҡһа, уны ҡайтара, .. көтөүҙең йә уңына, йә һулына сабып сығып һайтылдай башлай.* Һ. Дәүләтшина. *Һыйырҙар безелдәп, ҡойроҡ сәнсеп сапһалар ҙа, миңә ирмәк тойола.* И. Ғиззәтуллин.

**5.** Ашығыс рәүештә ҡайҙалыр йүнәлеү. *[Ғиләж — Мәхмүзәгә:] Бынау көн эҫеһендә Өфө сапмаһаң, һиңә нимә етмәгән.* Д. Исламов. *[Бригадир — Сәхипъямалға:] Хәҙер эш ваҡыты. Сәсеү бара. Һин баҙарға сабаһың.* Ш. Насыров. *Яуҙарға әйҙәп сапҡан оскор Салауат та тигән ир икән* (Халыҡ йырынан).

**6.** Ниҙер йәһәтләп, хәстәрләп йөрөү. *Дан артынан сабыу. Эш артынан сабыу. Йомош менән сабыу.* ■ *[Өмәт], бер эште алдына алһа, осона сыҡмай тороп туҡтамай — көн саба, төн саба, аҙап сигеп йөрөй торғас, бер нәмәһен килтереп сығара.* Д. Юлтый. *Әхмәт көн буйы сапты ла сапты, ә кисен ҡыҙыҡ эш уйлап тапты.* Ф. Рәхимғолова.

**7.** *иҫк.* Атлы яу менән килеп баҫыу. *Ғәйнәне сабыр өсөн урыҫ полкы килеп, арбанан кәлғә һуғып ятты.* «Батыршаның хаты». *Күсәк батыр Көләмбәт ырыуын сабып алды.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

♦ **Ҡот сабыу** *этн. кар.* **ҡот. Ылау сабыу** *кар.* **ылау. Юл сабыу** *кар.* **юл**[1] 1.

● *Ат саба тип эт саба.* Мәҡәл. *Байтал сабып бәйге алмаҫ.* Мәҡәл.

**САБЫУ** [3] (сап≠) *к.* **1.** Киҙәнеп килеп, ныҡ итеп һуғыу (биткә, яңаҡҡа һ. б.). *Сикәгә сабыу. Яңаҡҡа сабыу.* ■ *Ғәләү мулла һис көтмәгәндә Талипты бер уңға, бер һулға сабып ебәрҙе.* Р. Ғабдрахманов. *[Полицейский] теге прокла-*

*мациянын беребен курһэтеп: — Был нимэкэй? — тине, минен янакка берзе сабып ебэрзе.* Д. Юлтый.

**2.** Мунса эсеһендэ парланған миндек менэн тэнгэ һуғып-һуғып алыу. *Баланын аркаһын сабыу. Аяктарзы сабыу.* ■ *Гэрэй элэукэгэ йөз түбэн капланып, һузылып ятты ла аркаһын сабырға кушты.* Б. Бикбай.

♦ **Бот сабыу** *кар.* **бот.**[1] **Кире сабыу** *каршы килеү. [Колош:] Улар илден бэхетенэ кире сапкан бозоктар.* Т. Хэйбуллин. **Кул сабыу** *кар.* **кул** [1]. **Саба яуыу** ел ынғайына бэреп яуыу. *Саба яуған кар. Саба яуған ямғыр.*

**САБЫУ** [4] (сап*г*) *к.* **1.** Үткер корал (балта, кылыс һ. б.) менэн һелтэп кыркыу. *Ағаска сабыу. Өзэ сабыу. Сабып өзөү.* ■ *Сапкан сакта балтанын йөзө ниндэйзер тимер казауға тура килде.* К. Мэргэн. *Егет кылыс менэн сапкан икэн, ғифриттен башы эз генэ өзөлмэй калған* (Экиэттэн). / Һелтэгэн көс менэн кыркыу (коралға карата). *Балтаһы үткер, якшы саба.* ■ *Сапкан сакта таш ярған Урал батыр кылысы.* «Урал батыр».

**2.** Үткер корал менэн һелтэп, кисэк-кисэккэ кырккылау, ваклау. *Кумер сабыу. Утын сабыу.* ■ *Үтмэс балта тизэк сабырға булһа ла ярар эле.* Б. Бикбай. *[Катын] ит сабып керетеп, аш һалды.* Т. Килмөхэмэтов.

**3.** Балта менэн һелтэп, нимэлер юныу. *Кабык сабыу. Такта сабыу.* ■ *Юл буйкайзарында зур кайын, саба ла юна торогоз* (Сенлэүзэн)./ Балта менэн юнып, нимэлер яһау. *Ишек янағы сабыу. Өрлөк сабыу.* ■ *Көз ауыл халкы һалабаш һызыра, э кышын туғын саба, бурэнэ кырка.* Ж. Кейекбаев. *[Ауыл халкы] еп-йышыу ишеп, көрэк сабып, туғын бөгөп, дегет кайнатып ала ла, .. игенле яктарға сэфэр сыға.* С. Ғэбизуллин.

**4.** Үткер корал менэн һырлау, сэкэү. *Кыззар .. тэнкэлэрзе алып кыуандылар: «Эhемкэс, ун биш тинлек. Кыя сапкан»,— тип һикерештелэр.* Һ. Дэүлэтшина.

**5.** Үсеп ултырған игенде, бесэнде йыйып алыр өсөн салғы йэки машина менэн төптэн кыркыу. *Ашлык сабыу. Салғы менэн сабыу.* ■ *Ныязғол игененэ .. үзе саба торған машина төшөргэн, ти.* Һ. Дэүлэтшина. *„Тарырак ал,— тинен [эсэй],— алдынды, иплэп кенэ өйөрөп сап шулай. Йөзөн сэнсеп куйма салғындын“.* Р. Ғарипов.

♦ **Балта сабыу** зыян эшлэү.— *Үз бэхетенэ үзен балта сабаһын һин.* Ғ. Ғүмэр. **Өрлөккэ сабыу** *кар.* **өрлөк.**

**САБЫУЛАУ** *к.* Тиз-тиз кузғалыу; ашығып, йэһэтлэп, тегелэй-былай йүгереү. *Сабыулап йөрөп эзлэү.* ■ *[Председатель:] Мин һинен һымак район буйлап сабыулап йөрөмэйем.* Р. Солтангэрэев. *Көтөү-көтөү кейектэр сабыулап үтте.* И. Ғиззэтуллин.

**САБЫУСЫ** *и.* **1.** Иген йэки бесэн сапкан кеше. *Ашлык сабыусы.*

**2.** Ит һ. б. тураклаған кеше.

**САБЫУЫЛ** *и. кар.* **сапкын**[3]. *Тереклектэрен һаклау өсөн дошман сабыуылына каршы сыккандар.* Ғ. Ибраһимов.

**САБЫУЫЛЛАУ** *к. кар.* **сабауыллау.** *Хэзер ук тирэ-якты сабыуыллап урап сығырғы кэрэк.* С. Кулибай.

**САБЫШ** *и.*, **ат сабышы** Һыбайлылар ярышы. *Сабыш аты.* ■ *Ат сабышы ла булмаһа, һабантуй буламы ни инде ул.* Э. Вэли. *Нисек инде шул данлы бэйгегэ бармай калырһын? Ике йыл бит ул [Фэхри] үзе — көрэштэ, э ерэн аты сабышта беренсе урынды тотоп килэ.* Б. Бикбай.

**САБЫШКЫ** *с.* Шэп саба торған, бэйгелэ сабыша торған (атка карата). *Беренэн-бере якшы сабышкы аттар йөзэр сакырымдан йыйылған.* Б. Бикбай.

● *Сабышкы сабыр, даны хужаһына булыр.* Эйтем.

**САБЫШТЫРЫУ** *к.* Шэп сабыузa ярыштырыу. *Сэмэр хан уландарын .. ат сабыштырырға ебэргэн. Алты улы арғымактарына, Заятүлэк дунэненэ [менеп] сабышырға китэлэр.* «Заятүлэк менэн Һыуһылыу».

**САБЫШЫУ** [1] *к.* **1.** *урт. кар.* **сабыу**[2]. *Сабышып йөрөү.*

**2.** Шэп сабыузa ярышыу. *Бэйгелэ сабышыу.* ■ *Алты туған аттарына менэ һалып кем узарзан сабышып китэ.* «Заятүлэк менэн Һыуһылыу».

**САБЫШЫУ** [2] *к. урт. ярзамл. кар.* **сабыу**[4] 2, 3, 5. *Бесэн сабышыу. Ит сабышыу. Такта сабышыу.*

**САБЫЯ** [*ғэр.*] *и.* **1.** Бэлэкэй кыз бала. *Кил, сабыям, килсе, ғисмэттэн яралған сөнбөлөм.* Ш. Бабич.

**2.** *диал.* Сабый.

**САВАННА** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* Тропик бүлкэттен ара-тирэ ағас, кыуак менэн капланған үлэнле тэбиғэт зонаһы; тропик урманлы дала (Африка менэн Көньяк Америкала экваторзын ике яғынан зур ғына майзанды эсенэ ала).

**САГА** [*рус.* ⟨ *сканд.*] *и. эз.* Боронғо скандинав һэм кельт халыктарынын батырзар тураһындағы прозалы хикэйэте.

**САГО** [*рус.* ⟨ *мал.*] *и.* Кайһы бер пальмаларзын крахмалынан, шулай ук бэрэнге һэм кукуруз крахмалынан эшлэнгэн ярма. *Саго ярмаһы.*

♦ **Саго пальмаһы** олононон үзэгенэн ярма эзерлэүгэ киткэн крахмал алына торған пальмалар төрө.

**САҒА** *и. диал.* Һака.

**САҒАЛАК** *и.* Һазандар ғаилэһенэ караған тэнкэһез йылға балығы.

**САҒАН** *и.* Киртлэсле кин япраклы каты ағас. *Кара саған. // Саған өстэл.* ■ *Кояш һаман юғарыға урлэй, сағандарым тора тын ғына.* С. Ғэбизуллин.

**САҒАРАК** *и.* Тирмэ башындағы уктарзын осон кейзерэ торған ин өскө дүнгэлэк. *Өстаған тирэһендэге төтөн, быу туп-тура сағарактағы аз ғына асып куйылған төнлөккэ урмэлэй.* И. Көсэпкол. *Урзэ, баш өстөндэ, сағарак утэ йондоззар курене.* Р. Ниғмэти.

**САҒАУЫН** *и. диал.* Саға торған бөжэк (бал корто, инкеш, һағызак һ. б.).

**САҒРА** *и.* Үтергэ кыйын булған тау-ташлы, ағаслы урын.

**САҒЫЛ** *и.* **1.** Тауҙың көнгә ҡараған яланғас (ғәҙәттә текә, ташлы) битләүе. *Сағыл башы. // Сағыл таш.* ■ *Юлдың ике яғында ла бейек-бейек тауҙар, таш ҡаялар. .. Ә сағылдарҙа төп-төҙ ҡарағайҙар үҫә.* И. Ғиззәтуллин. *Төшкәнемдә бейек сағылдан, ат биленләп, өркөп юлдан сығып, ҡусәрҙәрен ватты арбаның.* С. Кулибай.

**2.** *диал. ҡар.* **сауыл** 1. *[Мин] тип-тигеҙ яланда ниндәй яҙмыш менәндер япа-яңғыҙ [үҫеп] ултырған сағыл янына килеп туҡтаным.* Ә. Чаныш.

**САҒЫЛДЫР** *и. диал. ҡар.* **сирткес** 1. *Сағылдырҙы саҡтырыу.*

**САҒЫЛДЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **сағылдырыу**$^{1}$ 4—5.

**САҒЫЛДЫРЫУ**$^{1}$ *ҡ.* **1.** Яҡтылыҡ нурын йәки тауышты ҡаҡсытып, кире ҡайтарыу. *Йылға ай яҡтыһын сағылдыра. Ҡар ҡояш нурҙарын сағылдыра.* ■ *Ай Ҡояш нурҙарын сағылдырғаны өсөн генә яҡты булып күренә.* В. Сөләймәнов.

**2.** Асыҡ, ныҡ яҡтылыҡ төшөрөп, күҙ алдын ҡараңғылатыу, күрмәҫ итеү; сағылйытыу. *Ҡара урман эсенән .. күҙҙе сағылдырып ялтырап ятҡан ҡарҙы ярып, борғаланып борғаланып бер ләм юл сыҡҡан.* Ғ. Дәүләтшин. *[Сыраҡсы] ҡулында дөрләп янған сыраһын артҡараҡ ала. Әһә, тимәк, балыҡ бар. Яҡты балыҡтың күҙен сағылдырып ятмаһын өсөн шулай эшләй ул.* Н. Мусин.

**3.** Ниҙеңдер һынын, һүрәтен барлыҡҡа килтереү (шыма, йылтыр яҫылыҡ өҫтөнә ҡарата). *Һыу яр буйындағы ағастарҙы сағылдыра.*

**4.** Ниндәйҙер кисереште, фекерҙе һ. б. тышҡы яҡтан нисек тә белдереү, күрһәтеү; тышҡа сығарыу. *Фатима Тимерҙең ҡулын шатырлатып ҡыҫты. Был ҡыҫыуҙа күпме әйтеп бөтөлмәгән йылы һүҙ, сағылдырырға теләгән үкенесле тойғолар барҙыр, уныһы инде интегеүсенең үҙенә генә билдәле.* Б. Бикбай. *Председатель йөҙөндә хәстәрлек сағылдырып, һораштырырға керешә: — Йыл буйы эшләйһең дә эшләйһең Яҡшығол ағай, арытмаймы?* М. Кәримов.

**5.** Художестволы образдарҙа биреү, художестволы образдар аша күрһәтеү. *Очеркта нефтселәр тормошон сағылдырыу. Әҙәбиәттә коллективлашыу осорон сағылдырыу.*

**САҒЫЛДЫРЫУ**$^{2}$ *ҡ. йөкм. ҡар.* **сағыу**$^{1}$. *Саҡма сағылдырыу.* ■ *Ҡолморҙа старшина .. мылтығын алды ла Сурағолға тоҫҡап сағылдырҙы.* Т. Хәйбуллин.

**САҒЫЛЙЫТЫУ** *ҡ.* Көслө яҡтылыҡ төшөрөп, күрмәҫ итеү; күҙҙе сағылдырыу. *Ҡояш күҙҙе сағылйыта.* ■ *Нурйән күҙҙәрен сағылйыт[ҡан] осҡон өйөрмәһенән ысынлап та ҡаушап ҡалғайны.* С. Кулибай.

**САҒЫЛЙЫУ** *ҡ.* Яҡтылыҡ тура төшкәндән күрмәҫ булыу, сағылыу (күҙгә ҡарата). *Ҡояшҡа күҙ сағылйый.* ■ *Сәмиғулла менән Салиха .. лампа яҡтыһына күҙҙәре сағылйып, ингән кешене танымай торҙо.* Ж. Кейекбаев.

**САҒЫЛТЫУ** *ҡ. ҡар.* **сағылдырыу**$^{1}$. *Уйҙы сағылтыу.* ■ *Мең-мең төрлө сәскә күҙ сағылта, күңелемә уйҙар үрмәләй!* Т. Ҡарамышева.

**САҒЫЛЫУ**$^{1}$ *ҡ.* **1.** Һуғылып, кире ҡаҡсыу (яҡтылыҡ нурына йәки тауышҡа ҡарата). *Сағылған тауыш, бер аҙ ваҡыт үткәс кенә, ишетелә.* ■ *Байназар .. правление йортоноң элекке Гәрәй торған яғында ниндәйҙер ут сағылғанын күреп ҡалды.* Б. Бикбай. *Тыуып ҡына килгән ҡояш нуры үҙ салғымда уйнап сағылды.* Р. Ғарипов.

**2.** Көслө яҡтылыҡ төшөп, күрмәҫ булыу, сағылйыу (күҙгә ҡарата). *Һалҡын ҡояш нурҙарында уйнаған йәш ҡар саҡҡылары шул тиклем сағыу йымылдай, хатта ҡар өҫтөнә ҡарап та булмай, күҙ сағыла.* Ҡ. Ибәтуллин. *Ҡайҙа баҡма күҙ сағыла, шундай аҡлыҡ.* Ҡ. Даян.

**3.** Үҙенең һынын, һүрәтен шыма, йылтыр нәмәнең өҫтөндә күрһәтеү, барлыҡҡа килтереү. *Тонок ҡына һыуҙа шәүлә сағыла, Байгүбәгем ниҫән һау микән?* (Халыҡ йырынан).

**4.** Тышҡы яҡтан күренеү, тышҡа сығыу; белеңеү (тойғоға, эске кисерешкә һ. б. ҡарата). *Һөнәрсенең ғәжәп аҡыллы ҡарашлы уйсан күҙҙәрендә лә инде элекке ҡанатлы дәрт, бәйһеҙ сәм түгел, ә тәрән моң, әйтелмәгән зар сағылған.* З. Биишева. *Хан күҙендә хәйлә сағылды, өндәште ул тыныс, яғымлы.* М. Кәрим.

**5.** Әсе йәки һыуыҡтан сәңгеү (тешкә ҡарата).

**6.** *ҡар.* **салыныу**$^{3}$. *Күҙгә сағылыу. Ҡолаҡҡа сағылыу.*

**САҒЫЛЫУ**$^{2}$ *ҡ. төш. ҡар.* **сағыу**$^{1}$ 1, 2. *Беҙҙең йөрәк шундай саҡма таш — көн уғына сағылып тоҡана.* Ғ. Амантай.

**САҒЫЛЫУ**$^{3}$ *ҡ. төш. ҡар.* **сағыу**$^{2}$. *Кесерткәндән сағыла-сағыла, өсөбөҙ өс тәңгәлдән йылға буйына ташландыҡ.* Ф. Иҫәнғолов.

**САҒЫЛЫШ** *и.* **1.** Яҡтылыҡ йәки тауыштың кире ҡаҡсыуы, әйләнеп ҡайтыуы. *Ҡош тауыштарының сағылышы. Моңдар сағылышы. Ҡояш нурҙарының сағылышы.* / Нимәнеңдер нурға йылтылдауы. *Ҡар бөртөктәренең ҡояшҡа сағылышы.*

**2.** Нимәнеңдер йылтыр нәмәгә төшкән шәүләһе. *Тауҙың һыуҙағы сағылышы.* / Нимәнеңдер башҡа бер нәмәләге (мәҫ. уйҙағы, хыялдағы) кәүҙәләнеше. *Кешенең эске донъяһының сағылышы.* ■ *Яҙ килтергән шатлыҡ, ҡыуаныстың кешеләр йөҙөндә сағылышы ла уның [Сәғиҙәнең] күҙенә күренмәне.* М. Тажи.

**3.** Ниндәйҙер хәлдең, булмыштың тасуири саралар менән һүрәтләнеше. *Тормоштоң әҙәбиәттәге сағылышы. Сағылыш табыу.* ■ *Әҫәрҙәге Закир образы объектив ысынбарлыҡтың әҙәбиәттә дөрөҫ сағылышы ул.* Р. Баимов.

**4.** Ниндәйҙер эш-хәлдең шауҡымы, тәьҫире. *Бөтә ерҙә байлыҡ, бәхетле тормош, тәртип күҙгә бәрелеп тора. Инде икенсе ай дауам иткән дәһшәтле һуғыштың сағылышы күренмәйҙә.* З. Биишева.

**5.** Аңдың тышҡы донъяны сағылдырыу үҙенсәлеге, объектив ысынбарлыҡты образдарҙа, төшөнсәләрҙә биреү һәләте. *Сағылыш теорияһы.*

**САҒЫМ** *и.* **1.** Йәйге аяҙ көндәрҙә ер өҫтөнән земберләп күтәрелгән эҫе һауа; монар. *Ҡул аръяғындағы түбәлә ем-ем тулҡынланып сағым уйнай.* Ғ. Ғүмәр. *Һары диңгеҙ өҫтөндә күкһел сағым бәүелә.* Ғ. Аллаяров.

**2.** Офоҡ аръяғындағы алыҫ нәмәләрҙе күҙ алдына килтерә торған оптик күренеш (эҫе

сүлдәрҙә һауа ҡатламдарының төрлө дәрәжәлә йылыныуы арҡаһында була). *Хыялында Гёте гәрәп ҡом сахраларында гиҙә, оазистарына һоҡлана, гәжәйеп сағымдарына тап була.* Ғ. Хөсәйенов.

**САҒЫМЛАНЫУ** *ҡ.* Сағым (1 мәғ.) менән ҡапланыу, монарланыу. *Уйым китә алыҫ-алыҫтарға, сағымланған тауҙар башына.* Д. Юлтый.

**САҒЫР** [1] *и.* Араҡы ҡушылған буҙа. *Заман ахыры булды иһә, .. муллалар ҙа сағыр эсеп, зина ҡылғый* (Мөнәжәттән).

**САҒЫР** [2] *и. диал.* Күкһәүел. *Хәмдиә усаҡта сытырлап янған сағыр төбөрҙәрен төҙәтте.* Һ. Дәүләтшина.

**САҒЫР** [3] *с. диал. ҡар.* **шағыр** [1]. *Сағыр күҙ.*

**САҒЫУ** [1] (саҡ*ғ*) *ҡ.* **1.** Саҡма, ҡорос һ. б. шуның кеүек ҡаты нәмәне бер-береһенә һыҙа һуғып, осҡон сығарыу. *Шаһиморат .. саҡма сағып, тәмәке тоҡандырып ебәрҙе.* З. Биишева. *[Талип] Хәнйәр сағып Урал таштарына, ялтыратып осҡон туҙҙырған.* Б. Вәлит.

**2.** Атыр өсөн сирттереү. *Тауышка өйҙән .. бабай килеп сыға, мылтығын сағып ебәрә.* А. Ғирфанов.

**3.** *диал.* Ярыу (көнбағышты). *Маръя ҡыҙҙары ап-аҡ ҡулъяулыҡҡа көнбағыш һалып, сағып йөрөй.* Ғ. Дәүләтшин.

**САҒЫУ** [2] (саҡ*ғ*) *ҡ.* **1.** Теш йәки ҡаяу батырып, ағыу ебәреү (йылан-саянға, ҡортҡа ҡарата). *Йылан саға. Һығыҙаҡ саҡты. Сағып бөтөрөү.* ■ *Кил, йылан, кил, миндә ус юҡ, һис ҡурҡма һин, кил дә саҡ.* Ш. Бабич. *Бал ҡорттары айыуҙың еҫен һиҙеп һырып алалар, сағырға тотоналар* (Әкиәттән).

**2.** Оронған, ҡағылған саҡта ағыулап әсеттереү, әрнетеү. *Кесерткән саға. Саға торған медуза.* ■ *Тар һуҡмаҡ ситендәге кесерткәндәр аяғын саҡкан һайын, Хәтирәнең асыуы ҡабара барҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** *күсм.* Һүҙ әйтеп, рәнйетеү. *[Рәхимә — Айбулатҡа:] Имаметдин белеп әйтә шул: „Ҡуйыныңыҙҙа йылан аҫрайһығыҙ, ти. Ысын шул, ҡайһылай ҡаты сағаһың.* Һ. Дәүләтшина. *Һинең телең бал ҡортондай саға зәһәр.* Ҡ. Даян. / Ауыр кисереш тыуҙырыу, әсендереү; көйҙөрөү. *Тыңлайым мин .. ишетергә теләп әсәйем тауышын. Бер өн дә юҡ. Тып-тын. Йөрәгемде сағып алды әсә һағышы.* К. Кинйәбулатова.

**САҒЫУ** [3] *с.* **1.** Күҙ сағылдырғыс; салт. *Сағыу нур. // Сағыу балҡыу.* ■ *Ҡояш нурында уйнаған йәш ҡар .. шул тиклем сағыу йымылдай, хатта ҡар өҫтөнә ҡарап булмай.* Ҡ. Ибәтуллин. *Сағыу ҡояш көлә-көлә йәүһәр нурын ҡойғанда, йүгерә-йүгерә йыуа йыйҙым яҙғы йәшел урманда.* А. Игебаев. / Яҡты, ҡояшлы. *Сағыу көн.*

**2.** Күҙгә нық ташланған, асыҡ, баҙыҡ. *Сағыу төҫ.* ■ *Әсәйемә сағыу биҙәкленән күлдәклек .. алдым.* Н. Мусин. / *күсм.* Үтеп инерҙәй, үткер (ҡарашҡа ҡарата). *Сағыу ҡарашлы ҡатын.*

**3.** Яңғырауыҡлы, көслө; асыҡ. *Ҡапыл бер малай сағыу тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе.* М. Кәрим. *Мәктәп алды балаларҙың сағыу тауыштары менән шаулап тора.* З. Биишева.

**4.** *күсм.* Асыҡлығы, көсө, тәьҫире һ. б. яғынан башҡаларҙан айырылып торған. *Сағыу талант. Сағыу һәләт.*

**5.** *күсм.* Асыҡлығы, мәғәнәлелеге, ышандырыуы көсө менән ныҡ тәьҫир иткән. *Нәҫер .. поэтик публицистика булараҡ, яңы прозаның сағыу, ҡабарынҡы башланғысы булды.* Ә. Вахитов.

**САҒЫУЛАНЫУ** *ҡ.* Сағыу [3] булыу, сағыуға әйләнеү. *Мин .. сағыулана барған таң нурҙарына ҡарап ятам.* Й. Солтанов.

**САҒЫУЛАТЫУ** *ҡ.* Сағыу [3] итеү, сағыуға әйләндереү. *Ҡояш та бит төшөн еткерһә, сағыулата алтын нурҙарын.* Й. Солтанов.

**САҒЫШТЫРҒЫҺЫҘ** *с.* Тиңләштереп, сағыштырып булмаҫлыҡ. *Сағыштырғыһыҙ дәүмәлдәр.*

**САҒЫШТЫРМА** *с.* **1.** Төрлө күренештәрҙе сағыштырыуға нигеҙләнгән. *Сағыштырма анатомия. Сағыштырма грамматика. Сағыштырма метод.* / Сағыштырыу нигеҙендә төҙөлгән. *Сағыштырма мәғлүмәт. Сағыштырма таблица.*

**2.** Билдәле бер күләм, дәүмәл менән сағыштырылған. *Сағыштырма ауырлыҡ. Сағыштырма бейеклек. Сағыштырма оҙонлоҡ.*

**САҒЫШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **сағыштырыу.**

**САҒЫШТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Оҡшашлыҡ йәки айырмалыҡ кимәлен билдәләү өсөн нәмәләрҙе үҙ-ара ҡара-ҡаршы ҡуйыу. *Элекке тормошобоҙ менән хәҙерге көнөбөҙҙөң айырмаларын сағыштырып ҡарайбыҙ.* Т. Йәнәби.

**2.** Оҡшашлыҡ йәки айырмалыҡ йәһәтенән тиңләштереү; оҡшатыу. *Детсад балалары йөрөйҙәр. .. Уларҙы мин сағыштырып барам Сәйҙелдәрҙә күргән гөл менән.* Ғ. Сәләм.

**САДА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Кире сағылған, ҡаҡсыған тауыш; шаңдау.

**2.** Тауыш, ауаз. *Садаи хуш.* ■ *Урамда шулай уҡ шау-шыу, шатлыҡлы садалар яңғырай.* Б. Мирзанов. *Сәскәләрҙән сада сыҡмай, йығастарҙан нида сыҡмай* (Бәйеттән). / *күсм.* Күмәк фекерҙе белдергән һүҙ, күмәк фекер. *Садаи иттифаҡ.* ■ *Һәр тарафта мәҙәниәт тигән сада.* М. Ғафури.

**3.** Музыкаль тауыш. *Беренсе сада. Икенсе сада.*

**САДАҠӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Бер-береңә тоғролоҡ, дуҫлыҡ. *Әй фәсих, күп әҙәмдә садаҡәт ҡалманы.* «Ғибрәтнамә».

**САДАРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Етәкселек. *Уның дек сыҡманы садарә рәсүлдәр араһынан.* М. Өмөтбаев.

**САДИЗМ** [*рус.*] *и. ҡар.* **садислыҡ.**

**САДИР** [*ғәр.*]: **садир булыу** *иҫк. кит.* барлыҡҡа килеү, ғәмәлгә, алға килеү. *Башҡорттарҙы казак итеү тураһында фарман садир булғас, бәғзе башҡорт ауылдары казак булыуҙан баш тартҡан* (Хикәйәттән). **Садир итеү** барлыҡҡа килтереү, ғәмәлгә ашырыу.

**САДИСЛЫҠ** *и. кит.* **1.** Үҙ енси тойғоһон ҡәнәғәтләндереү өсөн башҡа енес кешеһенә әрнеү яһап, уны интектереү теләгенән ғибәрәт енси боҙоҡлоҡ.

**2.** Йырткыстарса яҙалауға, интектереүгә булған ләззәт, нормаль булмаған теләк.

**САДИСТ** [*рус.*] *и. кит.* Садислыҡҡа ныҡ бирелгән кеше.

**САДӘ** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Ябай, еңел; ҡатмарлы түгел. *Садә эш. Яҙыусының теле садә.* ■ *Төхфәт Йәнәбиҙең .. яҙғандары ғәҙәттән тыш садә, аңлайышлы.* И. Насыри.

**2.** Эскерһеҙ, хәйләһеҙ, саф. *Садә күңел. Садә кеше. // Үҙеңде садә тотоу.* ■ *Аһ татар ҡыҙы, һин ниндәй садә, ләкин ни кәҙәр жаҙибәле вә матур.* Ә. Танғатаров.

**САДӘЛӘШЕҮ** *к. иҫк. кит.* Ябайлашыу. *Шул [1848] йылдан башлап Россияла ла почта эше бер аҙ садәләшә башланы.* Ғ. Ғисмәти.

**САҘАҠА** [*ғәр.*] *и.* Алла исеменә төбәп, доға ҡылдырып биргән нәмә; хәйер. *Мулла ағай менән хәлфәләр, кем күберәк хәйер, саҙаҡа бирә, шуларҙы яҡшыраҡ уҡыта.* М. Ғафури. *[Тәңкәбикә — дәрүишкә:] Яҡшы хәбәрең өсөн, изге кеше, саҙаҡа итеп, күтәүемдән үҙеңә оҡшаған йылҡыны һайлап ал.* М. Кәрим.

♦ **Фытыр саҙаҡаһы** *кар.* **фытыр.**

● *Саҙаҡаһына күрә доғаһы.* Әйтем.

**САЖ** *окш.* Ҡыҙған майлы табаға ниҙер һалғанда йәки етеҙ хәрәкәт менән ниҙер ҡырҡҡанда, ышҡығанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Саж итеү.*

**САЖИН** [*рус.* сажень] *и.* **1.** Метрик системаны индергәнгә тиклем ҡулланылған, 2,13 метрға тигеҙ булған элекке оҙонлоҡ үлсәү берәмеге. *Һыуҙың киңлеге биш сажиндан ары юҡ.* Д. Юлтый. *Беҙ ишектән биш-алты сажин ситтәрәк бер туңәрәк яһап торабыҙ.* Ғ. Хәйри.

**2.** (*йәки* **сажин таяғы**) Шул оҙонлоҡҡа тигеҙ үлсәү ҡоралы. *Сажин таяғы менән ер үлсәү.* ■ *Халыҡты икегә бүлеп, ерҙе үлсәй ҙә башланылар. Ҡайһы берҙәре сажин атлатып китте, ҡайһылары уртанан айыра барҙы.* И. Насыри. *Шаҡай менән атаһы .. ишек алдына сыҡҡан да пландарының яртыһын алыр өсөн сажин таяғы менән үлсәп йөрөй икән, ти* (Әкиәттән).

**3.** Нимәнеңдер шул үлсәүгә һалынған күләме (ғәҙәттә һандар менән күрһәтелә. *Колонна 54 квадрат сажин киңлегендәге ҡалҡыу майҙансыҡҡа урынлаштырылаcаҡ.* В. Нафиков. *Беләбеҙ, һеҙгә күп ер кәрәкмәй, ни бары бер сажин, тип [түрәләр] Сурағол, Айҙарҙарҙы ҡыҫмаҡҡа алдылар.* Т. Хәйбуллин. **Сажин ҡырҡыу** ошо үлсәм күләмендә утын әҙерләү; әрҙәнә ҡырҡыу. *Аҡбулат карт ғүмер буйы сажин ҡырҡҡан да ҡыуғын ҡыуған* (Әкиәттән).

**САЖИНЛАУ** *к.* Сажинға (1,3 мәғ.) һалыу. *Сажинлап ер үлсәү. Сажинлап сығыу.* ■ *Минең атайымдың төп һөнәре тауҙан сажинлап таш сығарыу һәм таштан нигеҙ, келәт һалыу ине.* Т. Йәнәби.

**САЖИНЛЫ** *с.* Күпмелер сажинға (1 мәғ.) тиң. *Элекке, тау битләүен алып йәйелеп ятҡан иген, егермешәр сажинлы оҙон-оҙон өс эҫкерткә әйләнде.* Һ. Дәүләтшина.

**САЖЛАТЫУ** *к.* **1.** Саж иттереү, саж-сож килтереү. *Сажлатып балыҡ ҡурыу. Сажлатып ҡоймаҡ ҡойоу. Сажлатып бысҡы иғәү. Сажлатып утын бысыу.* ■ *Башҡорттар ҡылыстарын ҡынынан сажлатып һурып алды.* Ә. Ихсан.

**2.** *күсм.* Етеҙ хәрәкәт иттереү; йөрөтөү. *Иртә менән сажлатып Өфөгә лә килеп индек.* С. Агиш.

**САЖЛАУ** *к.* **1.** Саж итеү, саж-сож килеү. *Балта сапҡан, бысҡы сажлаған, ҡаҙау ҡаҡҡан тауыштар яңғырай.* А. Карнай. *Табала сажлап майлы ҡоймаҡ бешә, ти* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Тиҙ, етеҙ хәрәкәт итеү, йөрөү. *Сажлап китеп барыу. Сажлап килеп етеү.*

**САЖ-СОЖ, саж да сож** *окш.* Ҡабат-ҡабат саж иткән тауышты белдергән һүҙ. *Саж да сож балыҡ ҡурыу. Саж да сож ҡоймаҡ ҡойоу. Саж да сож бесән сабыу. Саж да сож саңғы шыуыу. Саж да сож сыбыҡ һелтәү. Саж-сож утын бысыу.* ■ *Ғәзиз тешләнеп ҡайыш сыбыртҡы менән үгеҙҙәрҙең арҡа буйҙарына саж-сож тартып та ҡараны, улар барыбер ҡуҙғалманы.* З. Ураҡсин. *Ҡазый алдына һуҙылып ятам да, шыйыҡ тал сыбығы менән саж-сож арҡаға һуҡҡанын көтәм.* М. Ғафури.

**САЖЫЛДАТЫУ** *к.* Саж-сож иттереү, саж-сож килтереү. *Сажылдатып ҡоймаҡ ҡойоу. Сажылдатып балыҡ ҡурыу. Сажылдатып бысҡы иғәү. Сажылдатып утын бысыу.* ■ *Ул арала пар ат егелгән ике сананы сажылдатып, өс кеше килеп туҡтаны.* Һ. Дәүләтшина. *Сажылдатып ҡырҡа егет короcто.* Х. Түләкәев.

**САЖЫЛДАУ** *к.* Саж-сож итеү, саж да сож килеү. *Сажылдап табала ҡоймаҡ бешә. Сарлағанда балта осҡон сығарып, сажылдап тора.* ■ *Ул [егет], бөтә көсөн һалып, осҡан уҡтай алға ынтылды. Саңғылар ҙа нығыраҡ сажылданы.* Ә. Байрамов.

**САЗ** [*фарс.*] *и.* **1.** Кавказ артында, Иранда, Афғанстанда һ. б. көнсығыш илдәрендә киң таралған ҡыллы музыка ҡоралы. *Саз уйнау.* ■ *Аһ, тағы унда берәүһе сирттерә моңло сазын.* Д. Юлтый. *Урал тауҙа ғына күпме шишмә! Һәр берeһе сеңләп кенә торған сазмы ни!* Н. Нәжми.

**2.** *күсм.* Йыр, моң. *Бәхеттең наҙы китте, сазы килде.* Ш. Бабич. *Саз ине йәш күңелемә һәр бер тәбиғәт лауҙары.* Д. Юлтый.

**САЗА́Н** *и. кар.* **һаҙан.**

**САИБ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Дөрөҫ, хатаһыҙ.

**2.** Нәҡ, хас. *Яҡын дуҫтар, туғандар ҡастылар яндан, саиб дошман.* Б. Мирзанов.

**САИЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Хәйер.[1] *Саил һорап, яланғастан кейем теймәй, үҙенә юҡ — кешегә ни бирһен инде.* Ш. Әминев.

**САИЛСЫ** *и. иҫк. кит.* Хәйер һораусы; теләнсе, хәйерсе. *Бирһәләр бер һыныҡ икмәк, саилсы шатлана.* С. Яҡшығолов.

**САЙ**[1] *и.* Ике тау араһы, тәрән соҡор; уй. *Сылтыр-сылтыр йүгерә кар һыуҙары уйһыу ергә, оҙон сайҙарға.* Т. Йәнәби. *Һәр ваҡыт һыу тулы булыр тәрән сайҙа.* М. Ғафури. *Ҡараһаҡал сапҡан юл ҡайҙа? Әлдә уның үткер ҡылысы ла һынды микән һуғышып был сайҙа?* (Халыҡ йырынан).

● *Яман сайға һыу төшһә, кисеү бирмәҫ үтергә.* Мәҡәл.

**САЙ**[2] *и.* Һыуҙың һай ерендә үҫкән оҙон һыу үҫемлеге; ылымыҡ. *Күлдең көмөш һыуын сайҙар баҫҡан, һайыҡҡан ул.* Ғ. Әмири.

**САЙ**[3] *и. диал. кар.* ләм 1. *Ҡорт ҡуҙғытып ел иҫер; күлең саҡ-саҡ сайҡалыр, саң туҙғытып сай ҡалыр.* Р. Ғарипов.

**САЙБАН** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* **1.** *кар.* **сатыр** [1] 1. *Ер-һыу өсөн ваҡиғалар булды. .. Һуңынан ике йәнептән моҡабил булдылар, сайбандар ҡорҙолар.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**2.** *кар.* **нығытма** 2. *Уҙ ерҙәрен дошман ябырылыуынан һаҡлар өсөн урҙар уйҙырып, сайбандар ҡороп, хәүеф-хәтәр килеүе хаҡында хәбәр бирер тороғға .. тамдар ҡуйып йәшәгәндәр.* Ғ. Ибраһимов.

**САЙҒА** *и. диал.* Һалдау.

**САЙҒАҠ** *и.* Ҡыуыш мөгөҙлөләр ғаиләһенә ҡараған, ҡуш тояҡлы, көйшәүсе дала хайуаны (антилопаның бер төрө).

**САЙҒАҠЛАУ** *к. диал. кар.* **ослау** [1] **1.** *Уғын осло сайғаҡлап, аҡ толпарға атлана* (Бәйеттән).

**САЙҒАРА** *с. диал. кар.* **сая** 1. *Ул сайғараның алдына сығырмын тимә.*

**САЙҒАШЫУ** *к. диал.* Теләшеү.

**САЙҘАУ** [1] *и. диал. кар.* **сай** [1]. *Айыуғолаҡ .. сайҙауға сығып, ҡороғон ҡылтыратты, йүгәнен шылтыратты, ти* (Әкиәттән).

**САЙҘАУ** [2] *и. диал. кар.* **тараlғы** [1]. *Ҡайыш сайҙауы.*

**САЙҘАУ** [3] *к. диал. кар.* **сайҡау** [2] *Кер сайҙау.*

**САЙҠАЛДЫРЫУ** *к.* **1.** Тыныс һыу өҫтөндә тулҡын барлыҡҡа килтереү; тулҡындырыу. *Күлдә сайҡалдырып, биҙрә менән һыу алыу.*

**2.** Ниндәйҙер көс тәьҫир итеп төрлө яҡҡа һелкендереү, ҡуҙғатыу; бәүелтеү. *Арба сайҡалдыра. Вагон сайҡалдыра. Кәмәне сайҡалдырып ел иҫә.* ■ *Ҡыуғаны .. һыуҙың көсәйә барған ағымы сайҡалдыра, шуға ҡалтырай ул.* Б. Бикбай. *Кәмә менән сығарып барған егеттең ҡатынға күҙе төшә. Һыу уртаһында .. кәмәһен ишмәй, ҡатынды шаяртып, сайҡалдыра башлай* (Әкиәттән). / Көс ҡулланып йәки ауырлыҡ менән һелкетеү, ҡуҙғатыу; ситкә ауышайтыу, бәүелтеү. *Ағасты сайҡалдырыу.* ■ *Сирень ҡыуаҡтарын сайҡалдырып, концерт бирә аҫыл һандуғас.* К. Хәбиб.

**3.** *күсм. диал. кар.* **тулҡындырыу** 2.

♦ **Диңгеҙ сайҡалдырыуы** карапта барғанда тулҡында бәүелтеп, башты әйләндереп, ҡоҫторор ауырытыу.

**САЙҠАЛТЫУ** *к. кар.* **сайҡалдырыу** 1, 2.

**САЙҠАЛЫУ** [1] *к.* **1.** Тыныс һыу өҫтө тулҡынланыу. *Диңгеҙ сайҡала.* ■ *Тынысланған инде упҡындар, сайҡала тик ап-аҡ тулҡындар.* Ғ. Әмири. *Волга тулҡындары Кремлдең ярҙарына бәрелә сайҡалып.* Р. Ниғмәти.

**2.** Ниндәйҙер көс тәьҫиренән төрлө яҡҡа һелкенеү, ҡуҙғалыу; бәүелеү. *Аҡ елкәнле диңгеҙ карабы яй ғына сайҡалып ярға яҡынлашты.* З. Биишева. *Сәғиҙә тулҡындар араһында сайҡала-сайҡала ағып барған саңғыларға ҡарап торҙо.* М. Тажи. / Үҙенән-үҙе йәки ниндәйҙер тәьҫирҙән һелкенеү, ҡуҙғалыу; бәүелеү. *Флаг елгә сайҡала.* ■ *Хәҙисә әбейҙе сайҡалып киткән еренән тотоп ҡалдылар.* В. Нафиҡов.

**3.** *күсм.* Ҡайһы яҡҡа ауышырға белмәй, төрлө яҡҡа тайпылыу. *Уртасалар башта ике яҡҡа ҡаранып сайҡалһа ла, хәҙер ярлыларға ҡушылып, уның кеүәтен арттырған.* Һ. Дәүләтшина.

● *Диңгеҙ ел менән, халыҡ хәбәр менән сайҡала.* Мәҡәл.

**САЙҠАЛЫУ** [2] *к. төш. кар.* **сайҡау** [2] 1. *Кер сайҡалған. Туҫтаҡ сайҡалған.*

**САЙҠАЛЫШЫУ** *к. урт. кар.* **сайҡалыу** [1] 1, 2. *Ҡарағош менән Ҡарағол дейеүҙең еленә түҙә алмай, сайҡалышып тора, ти* (Әкиәттән).

**САЙҠАНДЫ** *и. кар.* **сайынды.** *Сайҡандыны түкмә. // Сайҡанды һыу.*

**САЙҠАТЫУ** [1] *к. диал. кар.* **сайҡалдырыу** 1,2.

**САЙҠАТЫУ** [2] *к. кар.* **сайҡау** [2]. *Кер сайҡатыу. Һыйырҙың еленен сайҡатыу.*

**САЙҠАУ** [1] *к.* **1.** Ниндәйҙер көс тәьҫир итеп, төрлө яҡҡа һелкендереү, ҡуҙғатыу; бәүелтеү; сайҡалдырыу. *Ел ағас баштарын сайҡай. Тулҡын кәмәне сайҡай.* ■ *Нурлы юлы машинаны .. һелкетә, уңға-һулға сайҡай башланы.* Я. Вәлиев. *Килке-килке ойоҡһотоп сапҡан ел ҡайындарҙы сайҡай.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Тегеләй-былай йөрөтөү, ян-яҡҡа һелтәү; болғау. *Ҡулды сайҡау.* ■ *Ат моронона элгән токсайҙы сайҡай-сайҡай, сөйә-сөйә ашай.* Ғ. Ғүмәр. *Ер тетрәтеп, уткер ҡылыс сайҡап, батыр менде Урал башына.* Х. Ғәбитов.

♦ **Баш сайҡау** аптырау, шелтәләү кеүек мөнәсәбәт белдереп, башты борғолау йәки һелкеү. *Миһран баш сайҡап, малайҙарға бармаҡ янаны.* Ш. Насыров.

**САЙҠАУ** [2] *к.* **1.** Һыуға тығып бер тегеләй, бер былай йөрөтөп йыуыу, йыуҙырыу; сайҡатыу, сайыу. *Һауыт-һабаны сайҡау.* ■ *Ашап бөтөп, һауыттарҙы сайҡап йыйыштырғас, [Индрил] тәмәкеһен тоҡандырып ала.* Д. Юлтый. *Йәмиләләр теҙелеп төшөп бара боҙ өҫтөндә керҙәр сайҡарға.* Ғ. Мәсғүт. / Өҫтән һыу йүгертеп йыуыу. *Ҡулды сайҡау.* ■ *Комғандағы һыу менән ҡулын сайҡап, урҙалағы таҫтамалға һөртө лә Сәйҙеямал табаҡҡа үрелде.* Я. Хамматов. *Тораһы, башты һалҡын һыу менән сайҡайһы, тирләп-тереп ҡаты сәй эсәһе ине, юҡ, торғо килмәй.* Б. Бикбай.

**2.** Дезинфекциялау, таҙартыу йәки дауалау маҡсаты менән йыуыу, сайҡатыу (ауыҙҙы, тамаҡты, тешге). *Тешге паста менән таҙартып сайҡау.*

**САЙҠАШЫУ** [1] *к. иҫк. кар.* **алышыу** [2] *[Урал:] Яфаланып, көс түгеп, һинең менән сайҡашмам.* «Урал батыр».

**САЙҠАШЫУ** [2] *к. урт. кар.* **сайҡау** [2]. *Беҙҙең Зилбәр бигерәк үҫкән, кер сайҡашты баҫмала.* Ф. Рәхимғолова.

**САЙЛАУ** *к. иҫк.* Тәртипкә килтереү, йыйыштырыу. *[Егет:] Туй булыр, өйҙөң эсен сайла.* «Буҙйегет».

**САЙМАН** *и. кар.* **һайман.** *Тамъян батыр .. һайлап-һайлап йөҙ илле батыр алған, кару ярак сайманын кейеп алған.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**САЙПЫЛДЫРЫУ** *к.* Сайҡалдырып, һауыттан ситкә һирпелдереү (шыйыҡлыҡты). *[Гөлгәйшә инәй] мөлдөрәмә һөттө сайпылдырмаҫҡа тырышып, яй ғына атлай.* Ш. Янбаев. *[Ҡыҙ] күнәктәрен сайпылдыра-сайпылдыра килә торғас, бөтөнләй хәле бөтөп йығылған* (Әкиәттән).

**САЙПЫЛТЫУ** *к. кар.* **сайпылдырыу.** *[Ямал:] Һыуынды сайпылтмай ғына алып ҡайт!* М. Тажи.

**САЙПЫЛЫУ** *к.* **1.** Сайҡалып, һауыттан ситкә һирпелеү (шыйыҡлыҡҡа ҡарата). *Сайпылып түгелеү.* ■ *Юл ҡаҙылған, сана йыш ҡына ҡәйе-*

*леп китә лә тулы мискәләге һыу сайпыла.* Б. Бикбай. *Һөт сайпылып китте.* К. Мәргән.

**2.** Ниндәйҙер көс һ. б. тәьҫир итеп, сайҡалып, тулҡынланып, ситкә ҡағылыу. *Кинәт ер тетрәне, сал ҡаялар ишелделәр туҙып, гөрһөлдәп. Күлдәр сайпылдылар, күк сайҡалды.* Х. Түләкәев. *Ишетелә — тургай һаман һайрай, ишетелә — тулҡын сайпыла.* Р. Бикбаев.

**3.** *күсм.* Урғылып ташып сығыу. *Күптән күңеле тулышҡайны инде Миңһылыуҙың, бына-бына сайпылырға тора ине.* Ғ. Ғайбурин. *Йөрәк тулы һағыш сайпылып, тим, үләндәргә тама күрмәһен.* М. Кәрим.

**САЙПЫЛЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **сайпылыу** 2, 3. *Кемдер төштө беҙҙең кисеүгә, сайпылышты Мейәс һыуҡайы.* К. Кинйәбулатова. *Сайпылышып шатлыҡ тулҡындары сәп-сәп бәрелә күңелем ярына.* Ш. Бабич.

**САЙПЫУ** *к.* Һирпеп, ситкә ҡағыу (шыйыҡлыҡты). *Ҡул менән һыуҙы сайпыу.* ■ *Төн. Йылға өҫтөндә тынлыҡ. Һыуҙы ишкәк сайпығаны ғына ишетелә.* Ә. Бикчәнтәев.

**САЙРАЛЫУ**[1] *к.* Ваҡ киҫәктәргә ярылыу, ватылыу; сайрау. *Араҡы шешәһе иҙәнгә төшөп .. сайралды.* Б. Бикбай.

**САЙРАЛЫУ**[2] *к. диал. төш. ҡар.* **сайрау**[2]. *Сайралған бысаҡ.*

**САЙРАТЫУ**[1] *к.* Ваҡ киҫәктәргә ярыу, ватыу. *Сайрата һуғыу.* ■ *Тәҙрәнең түбәнге өлгөһөн сайрата һуҡтылар.* Ф. Иҫәнғолов. *[Тулҡындар] ҡараптарҙы .. уйнатҡан-уйнатҡан да, ахыр ситкә таштарға бәреп сайратҡан.* З. Биишева.

**САЙРАТЫУ**[2] *к. диал.* Ләүкетеү. *Осконо бүлгәс, инде күп ҡалманы сайратырға утлы ялҡынын.* М. Тажи.

**САЙРАУ**[1] *к. ҡар.* **сайралыу**[1]. *Тәҙрә быялаһы сайрап төштө.*

**САЙРАУ**[2] *к. диал. ҡар.* **сарлау**[1] 1. *Бысаҡты сайрау.*

**САЙРАУ**[3] *к. диал.* Ләүкеү. *Сайрап яныу.* ■ *[Ҡарағайҙар] сайыр һымаҡ сайрап тоҡанғанғандар, көл ҡалғансы балҡып янғандар.* В. Ишмурзин.

**САЙЫЛ** [*ғәр.*] *с.* Шатлыҡлы, күңелле. *Биш кеше көн-төн былар йөрөнө, тине, шәһәрҙән шәһәр сайыл корҙо, тине.* «Буҙйегет».

**САЙЫЛДАУ** *к. ҡар.* **сыйылдау.** *Сайылдап ҡысҡырыу.*

**САЙЫНДЫ** *и.* **1.** Һауыт-һаба сайған һыу; йыуынды, сайҡанды. // *Сайынды һыу.* ■ *[Ынйыҡай:] Тойғонға беҙҙең сайынды һыуыбыҙ ҙа артмай!* Х. Ғәбитов.

**2.** Боронғо хөрәфәт буйынса им-том өсөн ишек тотҡаһын сайҡап алынған һыу. *Күҙ тейгәндә балаға сайынды һөртәләр.*

**САЙЫНЫУ** *к.* **1.** Йыуынып бөткәс, тәндәге һабынды, бысраҡ һыуҙы һ. б. йыуып төшөрөү; ҡойоноу. *Мунасала сайынып сығыу. Сайынып кейенеү.*

**2.** Йыуғысламай, һабынламай ғына йыуыныу. *Сайынып алыу.* ■ *Бит-ҡулды сайынып, табынға ултырыштылар.* Б. Бикбай.

**САЙЫР** *и.* **1.** Ылыҫлы ағастарҙың йәбешкәк ҡуйы һуты. *Сайыр ағыҙыу. Сайыр йыйыу.* ■ *Таҙа дегет туҙҙан эшләнә, ә ҡарағай сайырынан ҡайнатылғаны «шушмен» дегете тип атала.* С. Кулибай. **Сайыр һыҙыу** сайыр аҡһын өсөн ҡарағайға юлаҡтар һыҙыу. *Сайыр һыҙыуҙа эшләү.*

**2.** Һарыҡ йөнө араһында, ҡолаҡ эсендә барлыҡҡа килә торған һары йәбешкәк матдә. *Сайырға ҡатып ойошҡан был йөндө тартып-һуҙып тетә-тетә Емештең бармаҡтары талып бөттө.* З. Биишева.

**САЙЫРЛАНЫУ** *к.* Сайырлы (1 мәғ.) булыу, сайырлыға әйләнеү. *Зәлифә .. сайырланған ҡарағас утынды ҡаҙан аҫтына яғып, һалма һала.* Т. Хәйбуллин.

**САЙЫРЛАУ** *к.* Сайыр (1 мәғ.) менән ҡаплау, сайырлы итеү. *Саңғыны сайырлау.*

**САЙЫРЛЫ** *с.* **1.** Сайыры (1 мәғ.) булған, сайыры һарҡып торған (ылыҫлы ағасҡа ҡарата). *Сайырлы ҡарағай. Сайырлы булыу.*

**2.** Сайыры (2 мәғ.) ҡалҡҡан. *Сайырлы йөндө иләүе ҡыйын.*

**САЙЫРСЫ** *и.* Сайыр (1 мәғ.) ағыҙыу менән шөғөлләнгән кеше. *Сайырсы үткән һайын ҡарағай олонона берәр һыҙыҡ өҫтәлә бара.* З. Ураҡсин.

**САЙЫУ**[1] *к. ҡар.* **сайҡау**[2] **1.** *Һауыт-һабаны сайыу. Ҡулды сайыу.* ■ *[Татлыбикә:] Ауыҙыңды сай, балам, аштан һуң ауыҙың осонор.* Я. Хамматов.

**САЙЫУ**[2] *к. диал. ҡар.* **сабыу**[4] 1. *Балта менән айыра сайыу.*

**САЙӘ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Күләгә. *Харриәт сайәһе ергә төштө, һәр бер кәүем күләгәгә йүгерҙеште.* С. Яҡшығолов.

♦ **Шул сайәлә** шул сәбәптән. *Ғәлиәнең белеме артырға, фекере асылырға Мансур ҙа ярҙам итте. .. Шул сайәлә Ғәлиә лә байтаҡ белем хасил итте.* Ә. Иҫәнбирҙин.

**САКАУАЙ** [*рус.* соковой] *с. һөйл.* Дуплағыс матдә һутында эшкәртелгән (күнгә ҡарата). / Шул һутта эшкәртелгән күндән тегелгән. *Сакауай итек.*

**САКИН** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Билдәле бер урында йәшәгән (кешегә ҡарата).

**САКЛЯ** [*рус.* ⟨ *груз.*] *и.* Кавказдағы тау халҡы өйөнөң рустарҙа ҡабул ителгән атамаһы. *Сакля башына менеү.*

**САКСОФОН** [*рус.*] *и.* Тел ҡуйылған тынлы музыка ҡоралы (тынлы һәм джаз оркестрҙарында ҡулланыла).

**САҠ**[1] *и.* **1.** Ғүмерҙең бер өҙөгөнә тура килгән ваҡыт. *Бала саҡ. Егет саҡ.* ■ *Беҙ бәләкәй саҡтарҙа «ҡыҙ әүрәтә» торған әллә ниндәй доғалыҡтар була торғайны.* Т. Йәнәби. *[Шәһиҙә:] Әй, картайғас ни, тын ҡыҫыла. Йәш саҡтағы тауыш ҡайҙа ул.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ниндәйҙер эш-хәл башҡарылған, нимәләрҙер барған ваҡыт, мәл. *Дежурҙа саҡта. Емеш бешкән саҡ. Таң атҡан саҡ.* ■ *Тимерлектең көн-төн гөрләп торған сағы.* М. Тажи. *Көлгән саҡта мөмкин тиклем тауыш сығармай көлөргә тырышам.* С. Агиш. **Бер саҡ** билдәле бер мәл, бер ваҡыт. *Бер саҡ икәү ултырабыҙ тәҙрәнән тышҡа ҡарап.* Р. Ниғмәти. **Ҡай саҡ** ҡайһы бер ваҡытта; ҡай ваҡыт. *Ҡыш көндәре бигерәк яҡты була, аҡ төндәре ҡай саҡ буранлы.*

М. Хәй. **Һәр саҡ** гел генә; һәр ваҡыт. *Выждан тауышы һәр саҡ уның был уйын кире ҡаға.* З. Биишева.

♦ **Йылы саҡ** һәр нәмәнең үҙ ваҡыты, нимәлер эшләнгән мәл. *Күңелле һөйләшеүҙәр бер генә булманы, әлбиттә. Ләкин .., йылы сағында яҙып ҡалдырмағанлыҡтан, күбеһе онотолған.* С. Кулибай.

**САҠ** [2] *р.* **1.** Әле генә, яңы ғына. *Беҙ килгәндә, саҡ эңер төшкән ине.* Д. Юлтый.

**2.** Көс-хәл менән, көскә-көскә; ҡыйынлыҡ менән. *Саҡ атлап килеү. Саҡ күтәреү. Саҡ өлгөрөү. Саҡ риза булыу.* ■ *Быйыл Булат ауырып, .. беренсе класты саҡ тамамланы.* З. Биишева. *Беҙҙең арала талаш китте. Әсәйем икебеҙҙе саҡ айырып ебәрҙе.* Ғ. Минһажев.

**3.** (*йәки* **саҡ ҡына**) Хәбәре юклыҡ формаһы менән килгән һөйләмдә эш-хәрәкәттең була яҙыуын, көскә булмай ҡалыуын белдерә.— *Эй, .. иҫең китергор! Саҡ ҡына онотмағанмын, йә: беҙҙең шәшке-сәйгүндәр ҙә юҡ бит әле.* Ғ. Дәүләтшин. *Музыка уҡытыусыһының [ҡыҙыҡ холҡо] иҫемә килеп төштө лә .. саҡ көлөп ебәрмәнем.* М. Тажи.

**4. Ҡына** киҫәксәһе менән бергә килеп, «бик әҙ, әҙ генә» мәғәнәһен бирә. *Саҡ ҡына асыҡ. Саҡ ҡына бейек. Саҡ ҡына ҡалдырыу. Саҡ ҡына шыуҙырыу. Саҡ ҡына ятып тороу.* ■ *Саҡ ҡына аулаҡ ҡалһа, .. йылмайлап, үҙе килеп бөйөргә төртә.* Һ. Дәүләтшина. *Ғәйзулла бабай саҡ ҡына туҡтап торҙо.* Н. Мусин.

♦ **Саҡ ҡалыу** ниндәйҙер бер хәлгә төшә яҙыу; шул хәлдән көскә ҡотолоу. *Бәләнән саҡ ҡалыу. Үлемдән саҡ ҡалыу.* **Саҡ тороу** көскә генә йөрөү, тороу; көскә ултырыу. *Һаулығы насар — саҡ тора.* ■ *Ҡышҡы төн еле .. үҙҙәре саҡ торған өйҙәрҙе йыға яҙа.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Алыҫтағы саф булыр, бара-бара саҡ булыр.* Әйтем. *Эскән кеше — саҡ кеше.* Әйтем.

**САҠ** [3] *с.* **1.** Таман, йәпле. *[Рәшиҙә:] Кейеп ҡара әле, сакмы икән?* И. Абдуллин.

**2.** *күсм. ҡар.* **таман** 3. *[Гөлсәсәк:] «Беҙҙе һанға һуҡмай тайғайның — саҡ булған!»* — тип битәрләп, *ҡыйырһытырҙар, тип ҡурҡҡайным.* Д. Исламов.

**3.** *күсм.* Рухи тейәллекте, бөтөнлөктө белдергәндә ҡулланыла. *Күңеле саҡ ваҡытта ғына һөйләшә.*

♦ **Саҡҡа килеү** ҡыйын булыу, ҡыйынға төшөү. *[Сәлимә:] Беҙҙең егеттәр менән үҫал булып та бик саҡҡа килә әле.* А. Мөбәрәков.

**САҠ** [4] (*баш хәреф менән*) *и. ҡар.* **саҡ-суҡ.**

**САҠА** *и. диал.* Һаҡа.

**САҠАҠ** *и. диал.* Соңҡа, сәкәк. *Мырҙаҡай .. бүркен күтәреберәк, баштың саҡағынараҡ кейҙе.* Ғ. Дәүләтшин.

**САҠАМА** *и.* Сәкән [1] (1 мәғ.) тубы.

**САҠИЯ** [*гәр.*] *и.* Ер һуғарыу тәгәрмәсе. *[Берәү] шығырлап торған саҡияны әйләндерә.* З. Ғәбсәләмов.

**САҠҠЫС** *и. диал. ҡар.* **ҡаяу** [2] 1.

**САҠЛЫ** [1] *бәйл.* **1.** Төбәү килештәге исемдәр, алмаштар менән килеп, ара, ваҡыт сиген белдерә; тиклем, хәтлем, ҡәҙәр. *Ауылға саҡлы. Йәйгә саҡлы. Ошоға саҡлы. Таңға саҡлы.* ■ *Ике ҡаҙан һурпа аҙағына саҡлы ашап-эселде.* Ғ. Дәүләтшин. *Зыя саңғыла .. бер ҡараңғынан икенсе ҡараңғыға саҡлы тауҙар, урмандар араһында йөрөнө.* М. Тажи.

**2.** Төп килештәге исемдәр, төп һәм эйәлек килештәге алмаштар менән килеп, сағыштырма күләм, дәрәжәне белдерә; хәтлем, ҡәҙәр. *Ҡулдан килгән саҡлы.* ■ *Мин туғыҙ менән барам, ә Ок- сананың яңы һигеҙе тула. Ҡыҙ булһа ла ул минең саҡлы.* М. Кәрим. *«Мөхтәсар»ҙы Мамлеев саҡлы бәрәү ҙә сәйнәмәҫ.* Ш. Бабич. / Ҡабатланып килгән төп һүҙҙе бәйләп, юғары күләм, дәрәжәне белдерә. *Һин кул саҡлы күлде күтәрерлек шундай бер бәһлеүәнһең икән* (Әкиәттән).

♦ **Был** (*йәки* **шул**) **саҡлы** бик ныҡ, үтә. *Атайың да шулай саба ине — был саҡлы ла оҡшар икәнһең.* Р. Ғарипов. *Айға, көнгә генә тиңәмәйем — һылыулығың, Шәүрә, шул саҡлы* (Халыҡ йырынан). **Ни саҡлы** *шул уҡ* ни **ҡәҙәр** (*ҡар.* **ни** [1]).

**САҠЛЫ** [2] *р. диал. ҡар.* **саҡ** [2] 1.

**САҠЛЫ-СОҠЛО** *р.* Бик әҙ генә. *Күҙе саҡлы-соҡло ғына күрә. Ул заманды хәҙер саҡлы-соҡло ғына беләм.*

**САҠМА** *и.* **1.** *ҡар.* **саҡматаш** 1. *Мин саҡма сағып, ут тоҡандырып юлды яҡтырттым да атымды атлаттым.* Ш. Шәһәр. *Булған заман ... Утты саҡма сағып алғанғамы икән ул саҡта, кешеләрҙә һис ут өҙөлмәгән, ҡабыныр ут ҡалған усаҡта.* Н. Нәжми.

**2.** Мылтыҡтың пистонға һуға торған өлөшө. *Саҡманы ултыртыу.* ■ *Сәләхетдин тоҫҡап, сәкене тартһа, мылтыҡ атылмай ҙа ҡуя. Саҡманы күтәреп, бер иптәше сүкетеп ҡарай — тауыштын юҡ.* Н. Мусин. *Мылтыҡ саҡмаһы ҡапыл пистонға һуҡты, .. шул ыңғайға көбәктән йәҙрәләр атылып та сыҡты.* С. Агиш. **Саҡма мылтыҡ** *ҡар.* **мылтыҡ.**

♦ **Саҡма тояҡ** [**ат**] бик етеҙ, шәп атҡа ҡарата әйтелә.

**САҠМАТАШ** *и.* **1.** Сағып, һыҙа һуғып, ут тоҡандырыу өсөн ҡулланылған махсус таш; саҡма. *Юлаусылар саҡматаштарын сағып, тәмәке көйрәтеп ебәрҙе.* С. Кулибай. *Ә саҡматаш тупаҫ, ябай ғына, әгәр һуҡһаң, эстән ут сыға.* Х. Ғиләжев.

**2.** *ҡар.* **суйыр.** *Мәмерйәлә саҡматаштан яһалған ябай ҡоралдар бар.* Д. Бураҡаев. *Уҙған саҡта Өфө урамдарын саҡматаштар ҡала сағылып.* С. Ҡудаш.

**САҠМАТҮШ** *и. диал.* Алмиҙеү.

**САҠСА** *и.* **1.** Мөгөҙҙән яһаған дары һауыты. *Саксаға дары тултырыу.* ■ *Ун дүрт йәштән Аҡъюл мылтыҡ аҫып, сакса тағып йөрөнө урманда.* Р. Бикбаев. / Мөгөҙҙән яһаған тәмәке һауыты. *Ҡарт .. кеҫәһенән сакса сығарып, насыбай еҫкәй башланы.* И. Көҫәпҡол.

**2.** Һунарсының бер ҡайышҡа теҙеп, биленә тағып йөрөткән мылтыҡ яһағы өсөн кәрәк нәмәләре (дары, дороп, пистон һауыты, дары үлсәгес һ. б.).

**САҠСАҠ** *и. диал.* Баса тун.

**САҠСАУЫЛ** *и.* Алабуталар ғаиләһенә ҡараған, Урта Азияның татырлы һәм ҡомло сүлдәрендә, ярымсүлдәрендә үҫкән ҙур булмаған

япраҡһыҙ ағас. *Аҡ саксауыл. Ҡара саксауыл.* ■ *Ҡылған, әрем үҫән ҡола яландар артта ҡалды, һирәк-мирәк саксауыл ҡыуаҡтары күренә башланы.* Ғ. Аллаяров.

● *Саксауыл утын ҡыҙғанса, һикһәндәге ҡарт үлер, саксауыл утын ҡыҙғандан һуң, ҡыҙыуына ҡыҙ үлер.* Әйтем.

**САҠ-СУҠ** *и.*, **Саҡ менән Суҡ** Бәйеттәге ике мифологик ҡош (эсә ҡарғышынан ҡошҡа әйләнеп, бер-береһен күрә алмай интеккән ике бер туған ир бала). *Саҡ-Суҡ бәйете.* ■ *Урман эсендә коштар һайрайҙыр, ҡош араһында Саҡ-Суҡ илайҙыр* (Бәйеттән).

♦ **Саҡ менән Суҡ шикелле йәшәү** икеҥ ике яҡта күрешә алмай интегеү. *[Бибисара:] Ул көндәрҙе онотоу ҡайҙа ул. Саҡ менән Суҡ шикелле йәшәнек бит икебеҙ ике илдәрҙә.* Ғ. Шәрипов.

**САҠТЫРЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Атыр өсөн сирттереү (атыу ҡоралын). *[Гөлбоҫтан:] Күрше-күлән уяныр сығыр ине, мылтығыңды тоҫҡап саҡтырһаң.* М. Тажи.

**2.** *ҡар.* **сағыу** [1] 1. *Сакма саҡтырыу.*

**САҠТЫРЫУ** [2] *ҡ.* **1.** Тешен йәки ҡаяуын батыртып ағыу ебәртеү (йылан-саян, ҡорт һ. б. ҡарата). *Бал ҡортонан саҡтырыу. Йыландан саҡтырыу.*

**2.** Оронол, ҡағылып ағыу ебәрә торған нәмәнән әрнеттереү, эсеттереү. *Кесерткәндән саҡтырыу.* ■ *Бәләкәй малайҙар теләшеп торһалар, ололары тота ла кесерткән йолкоп алып, уларҙың ялангас ерҙәрен саҡтырып бөтөрәләр ине.* Ғ. Хәйри.

**САҠЫРТЫУ** *ҡ.* **1.** Берәй кеше йәки яҙыу, хат һ. б. аша кемделер үҙ янына килтертеү. *Батша Өйрәнсекте үҙ һарайына саҡыртып алған.* З. Биишева.— *Кисә һине саҡыртмаксы инем, ауырый тинеләр.* С. Агиш.

**2.** Берәй эш йәки маҡсат менән ҡайҙалыр килергә ҡушыу, саҡырып килтереү. *Йыйылышҡа саҡыртыу. Кәңәшмәгә саҡыртыу.* ■ *Мин ҡайтып, рота бойорого менән уткәрелгәндең иртәгеһенә мине штабка саҡырттылар.* Д. Юлтый. *Становой пристав .. ауылдағы шик төшкән бөтә кешеләрҙе саҡыртып, бермәләп допрос ала башланы.* Һ. Дәүләтшина.

**САҠЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **саҡырыу** [1]. *Йыйылышҡа саҡырылыу. Ҡунаҡҡа саҡырылыу.*

**САҠЫРЫЛЫШ** *и.* Эшләү, эшмәкәрлек менән шөғөлләнеү өсөн ниндәй ҙә булһа коллегиаль органға һ. б. бер һайлауҙа һайланған вәкилдәр йыйылышы. *Ҡала советының икенсе саҡырылыш сессияһы.*

**САҠЫРЫМ** *и.* **1.** 1060 метрға тиң булған элекке алыҫлыҡ үлсәү берәмеге. *Биш-алты саҡырым баргас, беҙгә ун минут ял бирәләр.* Д. Юлтый. *Ике саҡырым ер киткәс тә беҙ ултырҙыҡ ҡалҡыуҙа* (Бәйеттән).

**2.** *һөйл. ҡар.* **километр.** *Һайгисеү тигән үреҥ ауылдан бер саҡырым түбәндә.* Н. Мусин.

♦ **Саҡырым бағанаһы** юлдағы саҡырым йәки километр араһын күрһәткән бағана.

**САҠЫРЫМЛАП** **1.** *р.* Саҡырымға һалып. *Саҡырымлап үлсәү.*

**2.** *сама һ.* Күпмелер саҡырым тираһе. *Ике саҡырымлап ер.*

**САҠЫРЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Тауыш биреп йәки ымлап үҙ янына килергә тәҡдим яһау, ҡушыу. *Хәйруллин мине бик йәтеш кенә итеп, һуҡ бармағы менән саҡырып ала.* С. Агиш. *Байгужа менән Буранбаев мине ҡысҡырып саҡырып алдылар.* Д. Юлтый. *Бер ҡыҙыл этәс әллә нимә тапкан да көрк-көрк тип, тауыҡтарын саҡыра.* Ғ. Дәүләтшин. / Алҡыш йәки тауыш менән башҡарыусыны сәхнәгә һ. б. сығырға һорау. *«Өс туған», «Перовский», «Заһиҙа» бейеүҙәрен, «Таштуғай» көйөн башкарыусыларҙы [сәхнәгә] ҡат-ҡат саҡырып сығарҙылар.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Берәй эш йәки маҡсат менән ҡайҙалыр килергә тәҡдим итеү, килергә ҡушыу. *Йыйылышҡа саҡырыу. Концертҡа саҡырыу.* ■ *[Тәнзилә әбей:] Мейестәргә утын тығып ҡайтырға ғына йыйынғайным, Зыя мине үҙенең булмәһенә саҡырып алды.* М. Тажи. *Бер шулай хат арҡыры ҡыҙҙар саҡырған, кил тип.* Ш. Бабич. / Һыйхөрмәт өсөн килергә өндәшеү, һый-хөрмәт күрһәтеү өсөн килтереү. *Ҡунаҡҡа саҡырыу. Ҡунаҡ саҡырыу. Ашҡа саҡырыу.* ■ *Заһира апай Сараны әсәһе менән сәйгә саҡырып алды.* Н. Мусин. *Аҡһаҡалдар: — Эй, уҙаман! Ҡымыҙ эсеп үтсе! — тип саҡырған [юлаусыны] үрге табынға.* С. Кулибай. / Ниндәйҙер бурысты үтәргә йәлеп итеү, тартыу. *Беҙҙе 1915 йылдың яҙында хеҙмәткә ҡаралырға саҡырҙылар.* Т. Йәнәби.

**3.** Ниндәйҙер эш башҡарырға, эштә ҡатнашырға тәҡдим итеү, үтенеп һорау. *Эргәмдә ултырған ҡыҙ туңәрәкте туктатырға әмер бирҙе лә, үҙенә бер егетте саҡырып алып, этәс булып ҡысҡырырға ҡушты.* Т. Йәнәби. *Саҡырсы һин, .. тартынмайса саҡыр, мин килермен, ҡар-буранлы юлһыҙ көндә лә.* К. Кинйәбулатова. / Ниндәйҙер эш башҡарырға кеше алыу, эш тәҡдим итеү. *Мәктәпкә яңы директор саҡырҙылар. Райкомға эшкә саҡырҙылар.*

**4.** Ниндәйҙер эшкә, маҡсатҡа ирешергә өндәү. *Көрәшкә саҡырыу. Яуға саҡырыу. // Беренсе Май саҡырыуҙары. Ленин саҡырыуҙары.* ■ *Салауат батыр үҙенең ғәскәрен һуғышҡа саҡырған саҡта ошо борғоно ҡысҡырттыра торған булған.* З. Биишева. *[Гармун] күңелдәрҙе сиртеп, алғы көнгә, киҫкен көрәштәргә саҡыра.* Ғ. Мәсғүт.

**5.** Кемдеңдер үҙен билдәле тәртип рамкаһында тотоуын талап итеү. *Тәртипкә саҡырыу. Тыныслыҡҡа саҡырыу. Уяулыҡҡа саҡырыу.*

♦ **Саҡырыу билеты** *ҡар.* **билет. Саҡырыу ҡағыҙы** *һөйл.* һуғышҡа алынғанды белдергән рәсми документ. **Тамаҡ саҡырыу** *ҡар.* **тамаҡ.**

● *Айға ҡарап аҡырма, илгә бәлә саҡырма.* Мәҡәл. *Һағынып барғандың хаҡы оло, саҡырып барғандың аты оло.* Әйтем.

**САҠЫРЫУ** [2] *ҡ.* Тауыш биреү (кәкүккә ҡарата). *Иртә күк күкрәгән, кәкүк иртә саҡыра башлаған яҙ.* И. Кинйәбулатов. *Быйыл ғына сыҡҡан бала кәкүк саҡыра белмәй саҡыра тау-ташта* (Халыҡ йырынан).

● *Иртә саҡырған кәкүктең башы ауырта.* Мәҡәл.

**САҠЫРЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **саҡырыу** [1] 1—4. *Ҡунаҡ саҡырышыу. Ярышҡа саҡырышыу.*

**САҠЫУ** *ҡ. ҡар.* **сәкеү** 1. *Беләҙек саҡыу.*

**САЛ** I *с.* **1.** Үҙ төҫө юғалып, аҡ төҫкә кергән, ағарған (сәс, йөнгә ҡарата); аҡ. *Сал мыйыҡ. Сал һаҡал.* ■ *Кәрим .. әсәһенең яулыҡ аҫтынан сығып күренеп торған сал сәсенә һәм ҡурылған йөҙөнә ҡарап йәлләне.* Я. Хамматов. *Ҡалын сал мыйыҡлы, тасай башлы бер ҡарт, һынаусан күҙ йүгертеп сыҡҡас: — һеҙ украин да, рус та түгел, ахыры,— тине.* Ф. Иҫәнғолов. / Сәсе, һаҡалы ағарған; оло йәштәге, күпте күргән. *Сал баш. Сал ҡарт.* ■ *Һай, ауыр һынауҙар төштө шул Юламан ҡарттың сал башына.* З. Биишева. *Фәхри .. көрәк һаҡаллы сал ҡарт менән һалҡын ғына күреште.* Б. Бикбай.

**2.** *күсм.* Аҡһыл төҫтәге. *Сал болот. Сал ҡылған.* ■ *Сал томан араһынан күренгән йылға буйы миңә Волганы хәтерләтә.* Ғ. Ғәйнуллин.

**3.** *күсм.* Бик боронғо; ҡарт. *Сал дала. Сал Урал.* ■ *Ваҡиғалар алыҫ-алыҫҡа, сал тарихҡа алып инеп китә.* И. Кинйәбулатов. *Беҙҙә сал тәбиғәтте лә йәшәртә торған көс бар.* А. Игебаев.

II *и.* **1.** Сәс, һаҡалға төшкән аҡ төҫ. *Сал кунған. Сал төшкән.* ■ *Йөрөй торғас, ул [Ғәндәлип] башына сал йүгергән ҡартҡа әйләнә.* Т. Килмөхәмәтов.

**2.** *күсм.* Ҡартлыҡ. *Әгәр ҡайғы күрһәң бер үҙең: «Ах, сал баҫкан,— тимә,— ер йөҙөн».* М. Кәрим.

◆ **Сал аҡ** ап-аҡ.

● *Байтал бейә булғансы, башыңа сал инә.* Әйтем.

**САЛА** [1] *с. иҫк.* Тейешле кимәлгә, дәрәжәгә етмәгән, уртаса; ярым-ярты. *Сала ҡымыҙ.* // *Темәс урманында атып киткәндәр. Ҡайныһы үлгән, ҡайныһы сала йәнһәр ята.* Х. Ғәбитов.

● *Ярлының бер түйыуы — сала байығыуы.* Мәҡәл.

**САЛА** [2] [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Намаҙ. *Мәзин манарала: «Мәүлит сала, мәүлит сала», тигән өн һалды.* Т. Йәнәби.

**САЛАБӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ныҡлыҡ, ныҡышмалыҡ.

**САЛАМАЙ** *и. диал.* Әүмәлә. *Саламай бешереү.*

**САЛАМАТ** *и. иҫк.* Киндерҙән үргән ҡамсы. *Тимер .. өйгә инеп, кереште, ти, саламат менән ҡартты һуҡтырырға* (Әкиәттән).

**САЛАМҒУЛА: саламғула ултырыу** башты эйеп, ике ҡулды тубыҡҡа ҡуйып, йөгөнөкләп ултырыу. *Күсәкбей Турахангә барып инә лә, алдына килеп, саламғула ултыра. Хан аптырап китә: бик ҙур үтенес менән килгәндә генә кеше шулай итә.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**САЛАН** *с. диал.* **1.** *ҡар.* **сабан** 1.

**2.** Ярһыу, яндырай. *Салан кеше.* // *Салан ҡыланыу.*

● *Салан ат менән сәфәр сыҡма.* Әйтем.

**САЛА-САРПЫ** *с.* Тейешенсә түгел; ярты-йорто, яҙа-йоҙа. *Сала-сарпы мәғлүмәт. Сала-сарпы һүҙ.* // *Сала-сарпы ғына ишетеү.* ■ *Кеше һүҙе кеше үлтерә, тип, мин сала-сарпы хәбәргә ышанманым.* Ғ. Вәлиев. *Врач заводта булған хәл тураһында судьяға сала-сарпы һөйләп алды.* Ж. Кейекбаев.

**САЛАТ** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған баҡса үҫемлеге (япрағын сей көйө ашайҙар). | Шул үҫемлектең ҡурған ит эргәһенә һалып биреү өсөн ҡаймаҡ, һеркә ҡушып әҙерләнгән япрағы.

**2.** Төрлө йәшелсәнән ваҡлап турап, йомортҡа, ит һ. б. тәмләткестәр ҡушып әҙерләгән һалҡын ашамлыҡ. *Итле салат. Помидор салаты. Торма салаты.* ■ *Егет бармаҡтары менән өҫтәлгә һуға-һуға менюҙы ҡарарға тотондо: ҡыҙҙырылған балыҡ, тауыҡ ите, .. салат.* М. Тажи.

**САЛАУАТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Маҡтау, данлау доғаһы. *[Мәғфүрә:] Өлкән еңгә, аяғыңды салауат әйтеп һыйпа, салауат әйтеп түкөрһәң дә ебәрә торған ул.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

◆ **Үткән эшкә салауат** булған эш булған, хәйерле булһын, тигән мәғәнәлә әйтелә. *Киләсәкте ҡайғыртайыҡ, үткән эшкә салауат.* С. Ҡудаш. **Салауат күпере** *ҡар.* **йәйғор.**

**САЛАУАТЛАП** *р.* Салауат әйтеп. *Салауатлап доға ҡылыу.*

**САЛАХИӘТ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **сәләхиәт.**

**САЛБАР** [*фарс.*] *и.* Билдән түбән кейелә торған балаҡлы өҫ кейеме. *Йорон салбар. Һырыған салбар.* ■ *Ул ҡулдарын салбар кеҫәһенә тығып, тирә-яғында ултырған кешеләргә ҡарап алды.* М. Тажи. *Байғужа баш аҫтынан алып салбарын кейә башланы.* Д. Юлтый. **Ҡыҫҡа салбар** балағы тубыҡтан юғары итеп тегелгән салбар. **Салбарлы күлдәк** салбары менән ҡуша тегелгән өҫ кейеме.

**САЛБАРЛЫҠ** *и.* Салбар өсөн материал. *Атайыма бер салбарлыҡтан башҡа нәмә алып ҡайта алманым.* Т. Йәнәби.

**САЛБАШ** *и. диал. ҡар.* **ҡашҡа.** 1. *Салбаш һыйыр.*

**САЛҒАЙ** *р. диал.* Салҡан. *Салғай барып төшөү. Салғай ятыу.*

**САЛҒЫ** *и.* **1.** Ҡул менән иген, бесән сабыу өсөн оҙон һапҡа һапланған, бөгөлгән ҙур бысаҡ рәүешендәге ҡорал. *Алты сирекле салғы. Бәкес салғы. Һоноҡ салғы. Ҡул салғыһы. Салғы һабы. Салғы тотҡаһы. Салғы йөҙө. Салғы ялы. Салғы сүкеү. Салғы яныу.* ■ *Салғыһын бик тәпсирләп тапаны, көйләне, .. бөгәҙен бәйләне.* Ф. Иҫәнғолов. *Йылтылдай салғы ялҡын шикелле, йәп-йәшел үлән ауа йөҙ түбән.* Р. Назаров. **Йөҙҙөрмә салғы** оҙон үләнде өҫтән йөҙҙөрөп саба торған һабы кәкре һоноҡ салғы.

**2.** Машиналағы иген, бесән саба торған ҡорал. *Биш сапҡыс таҡҡан трактор.* ■ *Ҡоро көндә лобогрейканың салғыһы күтәргән саң Зөлкәрнәйҙең ҡулдәктәренә, тамаҡ төбөнә, ҡолаҡтарына ултыра.* Ғ. Дәүләтшин.

**САЛҒЫЙ** *и.* Ҡаптырмалы өҫкө кейемдең билдән түбән ике яҡ алғы өлөшө; сабыу. *Салғыйҙы билгә ҡыҫтырыу. Салғыйҙы ҡымтыу.* ■ *Сәкмәненең оҙон салғыйҙарын ялтылдатып, [мулла] түргә уҙҙы.* З. Биишева. *Аҡбалуан .. оҙон тула сәкмәненең итәк салғыйын күтәреп .. йәшен һөрттө.* Т. Хәйбуллин.

**САЛҒЫЙЛАНЫУ** *к.* Һалынып төшөп тороу, салғыйға оҡшау. *Оҙон мыйыҡтары, ҡарлуғас ҡанаты һымаҡ, салғыйланып түбән төшөп тора.* Ғ. Ғүмәр.

**САЛҒЫЙЛАУ** *к.* Ике яҡ осон һалындырып, салғыйға оҡшатыу. *Атайымдың салғыйлап кырылған оҙон мыйығы түбән һалынып төшкән.* Ғ. Ғүмәр.

**САЛҒЫРТЛАУ** *к. диал. ҡар.* **самалау** 1. *Һөт эҙ, салғыртлап һал.*

**САЛҒЫСЫ** *и.* Ҡул салғыһы менән бесән, иген сапҡан кеше. *Салғысылар бригадаһы.*

**САЛДЫР** *и. диал.* Салыр. *Ағас салдыр. Тимер салдыр. Салдыр менән һарына ҡаҙыу.*

**САЛДЫРЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **салыу**[1]. *Мал салдырыу.*

**САЛИҠ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Бер мәҙһәп, дин тотҡан кеше.

**2.** Юлдағы кеше. *Шағирҙарҙың күбеһе — әһле салик.* Аҡмулла.

**САЛҠАЙТЫУ** *к. ҡар.* **саңҡайтыу.** *Башты салҡайтыу.*

**САЛҠАЙЫУ** *к. ҡар.* **саңҡайыу.** *Салҡайып баҫыу. Салҡайып ултырыу.*

**САЛҠАН** *р.* Арҡа менән аҫҡа, йөҙ менән өҫкә ҡарап. *Салҡан барып төшөү. Салҡан йөҙөү. Салҡан йығылыу. Салҡан төшөп ятыу. Салҡан һалыу. Салҡан әйләнеү.* ■ *[Ғатаулла] баш аҫтына ике ҡулын һалып, урындыҡҡа салҡан ятты.* Й. Солтанов. *Салҡан ятҡан килеш күккә ҡараным.* С. Агиш.

**САЛҠАР** *с. иҫк.* Йәйелеп, йәйрәп ятҡан; киң. *Аҡҡош, ҡыр ҡаҙҙары ҡалҡынышып, салҡар күлдә йөҙөп уйнайҙар.* Х. Ғәбитов.

**САЛҠАТАН** *р. ҡар.* **салҡан.** *Салҡатан йығылыу. Салҡатан ятыу.*

**САЛҠЫТЫУ** *к.* Ашҡындырыу, ярһытыу. *Ышанмаһам, көтөр инемме йөрәк башҡайымды салҡытып.* К. Кинйәбулатова.

**САЛҠЫУ**[1] *к.* Ашҡыныу, ярһыу. *Текә тау аҫтында, йылан һымаҡ борғаланып, [йылға] салҡып ағып ята.* Ғ. Дәүләтшин. *Ерәнсәкәй микән әй салҡыған, Етегән йондоҙ микән балҡыған* (Халыҡ йырынан).

**САЛҠЫУ**[2] *к. диал.* Салыҡлау. *Ат башын салҡып юрта.*

**САЛЛА** [*ғәр.*]: **салла аллаһө ғалиһө вә сәлләм** Мөхәммәттең исеменән һуң ололоҡлап әйтә торған һүҙ. *[Хәҙрәт:] Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт салла аллаһө ғалиһө сәлләм дә мөшриктар менән ҡаты һуғышҡан.* Ғ. Хәйри.

**САЛЛАНДЫРЫУ** *к.* Сал (II 1 мәғ.) итеү, салға әйләндереү; саллатыу. *Ахыры йырҙар иртә салландыра гел йәш булыр өсөн үҙҙәре.* Н. Нәжми.

**САЛЛАНЫУ** *к.* Сал (II 1 мәғ.) булыу, салға әйләнеү. *Күпме таңдар инде алланды, ҡара сәстәрем дә салланды.* Ф. Рәхимғолова.

**САЛЛАТЫУ** *к. ҡар.* **салландырыу.**

**САЛМА** *и. диал.* Сәлләә. *Салма салыу.* ■ *Эй, мулла абзый, ант итәмен аллаң менән, башыңдағы салмаң менән: өҫтән былай кеше төҫлө күренһәң дә, эсең-тышың тулы сеп-сей ялған менән.* Ш. Бабич.

**САЛМАБАШ** *и. диал.* Бәпембә. *Нәркәс салмабаш өҙөп алып, уға өрҙө. .. Уктарҙан торған салмаһы осоп төштө.* И. Абдуллин.

**САЛО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Карапта, гостиницала, пансионатта һ. б. ял бүлмәһе. *Салонда ял итеү.*

**2.** Көнкүреш яғынан хеҙмәтләндергән предприятиеларҙа, мастерскойҙарҙа һ. б. кешеләрҙе ҡабул итә һәм хеҙмәт күрһәтә торған бүлмә. *Парикмахерскийҙың иҙәр салоны.*

**3.** Төрлө нәмәләрҙе, сәнғәт әҫәрҙәрен күрһәтә, промышленность тауарҙарын һ. б. һата торған зал. *Күргәҙмә салоны. Музыка салоны. Художество салоны.*

**4.** *махс.* Төрлө транспортта пассажирҙар өсөн тәғәйенләнгән бүлмә. *Самолёт салоны. Трамвай салоны.*

**САЛПА** *с. диал.* Тынғыһыҙ, сабырһыҙ. *Салпа кеше.*

**САЛПАЛАНЫУ** *к. диал.* Сабырһыҙланыу, тынғыһыҙланыу. *«Ниңә әйтмәй ул, ниңә?!» — тип салпалана уның [ҡустының] күңеле.* Ә. Вахитов.

**САЛСЫҠ** *и. диал.* Һаҙамыҡ. *Елеп килеп бер салсыҡҡа еткәндә, таҙҙың ағалары кәзәләрен батырып сығара алмай тора икән, ти* (Әкиәттән).

**САЛТ**[1] *с.* **1.** Сит нәмә ҡатышмаған; саф, таҙа. *Салт алтын йөҙөк. Салт көмөш тәңкә.*

**2.** *күсм.* Эскерһеҙ, саф; асыҡ. *Мәүлиха инәйҙе күреп, уның зирәклегенә, салт күңеленә .. һоҡланмаған кеше юҡтыр.* Ш. Янбаев.

**3.** *күсм.* Асыҡ, зирәк. *Быуаттарҙың салт аҡылы һеңгән был ябайҙан ябай ҡоралға.* Р. Ғарипов.

**САЛТ**[2] *с.* Үтә ныҡ, бик ныҡ. *Салт аҡ. Салт саптар ат. Салт аяҙ күк.* ■ *Иртә менән генә салт аяҙ ине әле, киҫкә табан тиреҫ яҡтан ел сыҡты,.. ҡара болоттар күтәрелде.* Б. Бикбай. *Мин күнәм бөтәһенә лә — яҡшыға, яманына, көндәрҙең салт аяҙына һәм болотло сағына.* М. Кәрим.

**САЛТ**[3] *с. диал.* Етеҙ, йылдам. *Салт кеше.* // *Аяҡты салт баҫыу.* ■ *Йәмилдең атаһын .. колхоздың иң салт атын егеп .. район больницаһына илтеп һалдылар.* З. Биишева.

**САЛТ**[4] *р. диал.* Нәҡ, тап. *Салт төш ваҡыты. Салт үҙе.*

**САЛТ**[5] *оҡш.* **1.** Ус менән сикәгә йәки асыҡ тәңгә һуҡҡанда һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Салт итеү.* ■ *Ротный .. көтмәгәндә, ҡыҙып китепме, салт иттереп Әхтәмдең яңағына сабып ебәрҙе.* В. Исхаҡов. *Донъя мине ҡаҡҡан-һуҡҡан саҡта, йә битемә сапһа салт итеп, мин бит, ялбыр-йолбор ҡара малай, килеп етә инем ялт итеп.* Т. Йосопов.

**2.** *диал. ҡар.* **сылт**[1]. *Егет сихырлы таяғы менән йоҙаҡҡа төртә, йоҙаҡ салт итеп асылып китә* (Әкиәттән).

**3.** *диал.* Ялт. *Салт итеп ҡалыу.*

**САЛТА** *р. диал.* Нәҡ, тап. *Салта төш ваҡыты.*

**САЛТ-СОЛТ** *оҡш.* Тимер сынйырҙы һ. б. шундай нәмәне һелкетеп ҡаҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Салт-солт бәрелеү. Салт-солт килеү. Салт-солт итеү.*

**САЛТЫР** *оҡш.* Сынаяҡ, быяла төшөп ярылғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; сылтыр. *Салтыр итеү.*

**САЛТЫРАТЫУ** *к.* Салтыр иттереү, салтыр-солтор килтереү; сылтыратыу. *Егет ҡулындағы йүгәнен салтыратып атын саҡырҙы.*

**САЛТЫРАУ** *к.* Салтыр итеү, салтыр-солтор килеү; сылтырау. *Тәҙрәнең быяланы салтырап койолоп төштө.*

**САЛТЫР-СОЛТОР** *окш.* Ҡабат-ҡабат салтыр иткән тауышты белдергән һүҙ; сылтыр-сылтыр. *Салтыр-солтор килтереү. Салтыр-солтор итеү.*

**САЛФЕТКА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Ашағандан һуң һөртөнә торған дүрткел сепрәк йәки йомшаҡ ҡағыҙ. *Ғариф мыйығын, ауыҙын аҡ салфетка менән һыпырҙы.* Ғ. Хәйри. *Нәсимә .. өҫтәлгә таҙа ашъяулыҡ йәйеп, салфеткалар ҡуя.* Н. Иҙелбай. / Гигиена маҡсатында ҡулланылған бәләкәй таҫтамал йәки сепрәк киҫәге. *Парикмахер салфеткаһы.* ■ *Хужабикәбеҙ, яурыны аша аҡ салфетка һалып, алъяпҡыс быуып, кухнянан өҫтәлгә, өҫтәлдән кухняға йүгереп йөрөй.* Ф. Иҫәнғолов. / Ғәҙәттә аҡ төҫтәге бәләкәй өҫтәл ябыуы.

**САЛШАЙТЫУ** *к.* **1.** Салыш (4 мәғ.) итеү, салышҡа әйләндереү; ҡыйшайтыу. *Үксәне салшайтыу.*

**2.** Тәбиғи рәүешен боҙоп, ҡыйшайтыу. *Ауыҙҙы салшайтыу. Ирende салшайтыу.— Һаман яратаһыңмы, ә? — тине Бәҙри был юлы ирендәрен мыҫҡыллы салшайтып.* Д. Исламов. *Иванов .. ҡурҡыу тулған күҙҙәре менән комиссия ағзаларын ҡарап сыҡты ла, ауыҙын салшайтып, көләмһерәп ҡуйҙы.* Х. Мохтар.

**САЛШАЙЫУ** *к.* **1.** Салышҡа (4 мәғ.) әйләнеү, ҡыйшайыу. *Өйҙөң бәләкәс кенә тәҙрәләре ҡыйшайған бүрәнәләр ыңғайына ҡайныһы былай, ҡайныһы тегеләй салшайып ултыра.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Тәбиғи рәүеше боҙолоп, ҡыйшайыу. *Артабан нимә эшләргә белмәйенсә, ҡатып ҡалды, ирендәре салшайҙы, керпектәре йыш талпына башланы.* Д. Исламов. *Беҙ быуыштыҡ .. Яман асыу менән салшайҙы дошман ауыҙы.* Ғ. Әмири.

**САЛЪЮҒЫТ** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**САЛЫҠЛАУ** *к.* Башты аҫҡа-өҫкә һелкеү (атҡа ҡарата). *Аттар, көндөң эҫелегенән, көсәйеп киткән себендәрҙән баштарын салыҡлап ашамай торҙо.* Ғ. Дәүләтшин. *Яныҡайым .. һыуға төшөп батҡан ерендә, аты торған салыҡлап, тибенеп* (Халыҡ йырынан).

**САЛЫМЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **салымлау.** *Салымланған еп.*

**САЛЫМЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **салымлау.** *Йөнөмдө салымлатып алдым.*

**САЛЫМЛАУ** *к.* Иләнгән йөндө, епте ус менән терһәк йәки аяҡ башы менән тубыҡҡа тиклем оҙонлоҡта кәләпкә һалыу; аяҡлау.

**САЛЫМЛЫ** *с.* Салымлап уралған. *Салымлы еп.*

**САЛЫНЫУ** [1] *к. төш. ҡар.* **салыу** [1]. *Салынған мал.*

**САЛЫНЫУ** [2] *к.* **1.** Осо эләгеп тартылыу, эләгеп уралыу (арҡан, бау һ. б. ҡарата). *Арҡан бейәнең муйынына салына төшкәс, тулап ҡараһа ла, ыскына алманы, ти* (Әкиәттән).

**2.** Нимәгәлер эләгеп уралыу, сырмалыу. *Сыбыҡҡа салынып ҡолау.* ■ *Алдағы кешенең аяғы тимер сыбыҡҡа салыныпмы, кирбес өйөмөнә абыныпмы, гөрһөлдәп йығылды.* Ғ. Ильяс.

**САЛЫНЫУ** [3] *к.* Күреү йәки ишетеү ағзалары на еңелсә генә, өҙөк кенә булып һиҙелеү, эләгеү; сағылыу. *[Фәнис:] Эй, малайҙар, Бәйтулла бабайҙар нисек кенә йәшәй? Ни эшләп ҡарт бер ҙә күҙгә салынмай?* Р. Низамов. *Башҡорт һүҙе, башҡортомдоң моңо ҡолағыңа тик бер салыныр. Бер салыныр. .. Сәхәр ваҡытында шул моңдарҙы күңел һағыныр.* М. Кәрим.

**САЛЫР** *и.* Тамыр ҡаҙыу өсөн башын ҡарлау һымағыраҡ итеп, һабының төп яғына арҡыры ағас ҡуйып эшләгән ҡорал. *Салыр менән әтлек ҡаҙыу.*

**САЛЫУ** [1] *к.* Бысаҡ менән боғаздан ҡырҡыу. *Мал салыу.* ■ *[Ҡәйнәһе — Аҡбулатҡа:] Кейәү, хәҙер үк шул һарыҡты салып ташласы.* Һ. Дәүләтшина. *[Ҡарағөләмбәт:] «Һиңә ҡатын булмайым, тип әйтер булһаң, ошо урында бысаҡ менән салам»,— тине. «Бабсаҡ менән Күсәк».*

◆ **Салыу һөйәге** *ҡар.* **һөйәк** [1] **1.**

**САЛЫУ** [2] *к.* **1.** Осон аша һалып, эләктереп алыу (бәйләгәндә). *Салып бәйләү. Салып сигеү.* ■ *Бер ҡыҙ .. яулығын эйәк аҫтынан салып бәйләгән.* Ф. Иҫәнғолов. *Ишектән ҡыҙыл сырайлы, ал салма салған йәш, сибәр кеше килеп инде.* Ш. Шәһәр.

**2.** Өҫтө-өҫтөнә ишә һалыу (аяҡ-ҡулды). *Аяҡ салып ултырыу.* ■ *Ҡулдарын артҡа салып һала ла, тағы урам тирәһен ҡараштырып, аҡрын ғына атлап килә.* Ә. Вахитов. *Ғәлим ағай һикенең түренә үк менеп, тәҙрә яңағына һөйәлә биреп, аяҡтарын салып ултырҙы.* Н. Ҡәрип.

**3.** Ситтән уратып, аша киҫеү (юлды). *Һыуһар ағаслағайны, икенсе яҡтан юлын салып алдым.* М. Тажи. *[Янбай] һыбайҙарҙың алдын салып ҡараһа, ҡойроғон күпертеп, бер уңға, бер һулға һелтәп .. ҡасып барған бер йәнлекте күрә* (Әкиәттән).

◆ **Аяҡ салыу** *ҡар.* **аяҡ** [1] **1.**

**САЛЫУ** [3] *и. һөйл.* Малды салған урындағы муйын һөйәге.

**САЛЫУ** [4] *и. диал.* Кәйелтмәк.

**САЛЫУЛАТЫУ** *к.* Ҡырын ерҙә ситкә шыуҙырыу; кәйелтеү, һалыулатыу. *Йөрөйҙәр сана егеп, салыулатып, һалҡынлыҡтан ирендәрен ҡалтыратып* (Бәйеттән).

**САЛЫУЛАУ** *к.* Ҡырын ерҙә ситкә шыуыу; кәйелеү, һалыулау. *Сана еңел генә салыулап ала ла, тағы юлға төшә.* С. Агиш. *Машина тая-тая ҡорт һымаҡ һаман алға шыуышты, .. тәгәрмәстәр салыулап, һулға, упҡынға тартыла.* Р. Низамов.

**САЛЫШ** *с.* **1.** Тәбиғи түгел, ҡыйыш (ҡайһы бер ағзаларға ҡарата). *Ололарҙан көлмә, ҡустым, ауыҙың салыш булыр.* Б. Бикбай. *Директорҙың теше һыҙлай, ут күренә күҙенә. Ҡул яңаҡта, ауыҙ салыш, әрнеү сыҡҡан йөҙөнә.* Х. Түләкәев.

**2.** Күҙ алмалары төрлө яҡҡа ҡараған. *Яңы килгән шәкерттең йөҙө килешһеҙ, йәмһеҙ, күҙ-фәләне салыш йәки башы ҙурыраҡ булһа, уның «бәрей» булыуына шик тағы ла арта.* М. Ғафури. *Ҡорҡолдайы йоҙроҡ хәтле булып сығып торған арыҡ, оҙон муйынлы, салыш күҙле мулла .. мендәр өҫтөнә менеп ултырҙы.* З. Биишева.

**3.** Аяғы эс яҡҡа ҡарап торған. *[Сестра:] Үҙеңә*

*йөрөргә ярамаç. Врач кушмай. Аягы салыш булыр, ти.* Ғ. Ибраһимов. *Дуçың көлә, дошманың мыçкыллайҙыр, аягың бер нәмәнән салыш булһа.* Аҡмулла.

**4.** Ниндәйҙер яçылыҡҡа ҡарата ауыш, ҡыйыш; ҡыйыш урынлашҡан, ҡыйшайған. *Салыш тәҙрә. // Салыш тороу.* ■ *Ишек өçкө кугәненән һурылып сыгып, салыш аçылынып тора.* Б. Бикбай.

♦ **Салыш аяҡ** айыуға ҡарата әйтелә. *[Айыу:] Эй, төлкө! Һин ни өсөн минең улымды таш менән бәргеләнең? [Төлкө:] Шулай кәрәк ул салыш аяҡҡа.* Р. Мөхәмәтов.

**САЛЫШ-СОЛОШ** *с.* Төрлө яҡҡа ҡыйыш, ҡыйыш-мыйыш. *Салыш-солош теҙелгән тештәр. Салыш-солош тәҙрәләр. // Салыш-солош йөрөү.* ■ *Ауыр юл нык интектергән булһа кәрәк, малай салыш-солош атлай.* Ә. Бикчәнтәев.

**САЛЫШТЫРЫУ** *к.* **1.** *кар.* **салыу**² 2. *Аяҡты салыштырып ултырыу.* ■ *Әфләтунов .. оҙон кулдарын кукрәгенә салыштырып куйҙы һәм калынайып барган кәуҙәһен артка ташланы.* Ә. Вәли.

**2.** Береһен береһенә аша ҡуйыу. *Ҡара айғыр .. кайтырга тип юлга сыгыуын һиҙә, аяктарын йыш-йыш салыштырып ала.* С. Агиш.

**3.** *диал. кар.* **салшайтыу** 1. *Ауыҙҙы салыштырыу. Куҙҙе салыштырыу.*

**САЛЫШЫУ** *к.* **1.** *урт. кар.* **салыу**² 2. *Аяҡ салышыу.*

**2.** Осо сырмала килеп эләгеү, салыныу (арҡан, бауға һ. б. ҡарата).

**САЛЬДО** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* **1.** *бухг.* Счёттағы¹ (2 мәғ.) керем менән сығым араһындағы айырма.

**2.** *эк., сауҙа* Дәүләт менән дәүләт үҙ-ара иçәпләшкәндә керем менән сығым араһындағы айырма.

**САЛЬТО** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Спортсмен йәки артист һикергәндә, бер снарядтан икенсеһенә күскәндә һ. б. баш аша һауала тулы яһалған әйләнеш. *Ике тапкыр сальто. Өс тапкыр сальто.* ■ *Ринат: — Нимә, әсәй, сәйең кайнанымы ни әле? — тип трусиктан килеш баш аша бер сальто яһаны ла зарядкага сыгып йүгерҙе.* Ә. Әһлиуллин.

**САЛЮТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Байрам, хәрби парад, тантаналы осрашыу, ерләү һ. б. ваҡытында ҡотлау йәки хөрмәт белдереүҙең артиллерия йәки мылтыҡ залптары, флагтар, фейерверктар һ. б. менән башҡарылған тантаналы формаһы. *Еңеү салюты. Артиллерия салюты.* ■ *21 сентябрҙә .. Тыуган илебеҙҙең баш калаһы Мәскәу бер йөҙ ҙә егерме дүрт орудиенан ун ике артиллерия залпы менән Черниговты азат итеүселәр хөрмәтенә салют бирҙе.* Ә. Ихсан.

**2.** Пионерҙарҙың уң ҡулды баш өçтөнә күтәреп ҡотлашыу рәүеше. *«Һәр сак әҙермен!» — тип мин кайтканда салют биреп каршы алырһың.* З. Ҡотип.

**САМА** *и.* **1.** Күләм, дәүмәл, ара һәм ваҡыттың яҡынса бер кимәле. *Һыуһылыу әбейҙең сәйе кайнар самаларак курше әбейҙәр килә башланы.* Ғ. Дәүләтшин. *Мансуров менән Ғәләү .. йәшкә лә, белемдәре менән дә бер самала ине.* Б. Бикбай. / Билдәле бер күләм, дәүмәл, ара, ваҡытты күрһәткән һүҙҙәрҙән һуң килеп, шуның яҡынса булыуын белдерә. *Бер ай самаһы элек. Бер сакырым самаһы йүгерерү. Ике ай самаһы эшләү. Ике йөк самаһы бесән. Илле йәштәр самаһындагы кеше. Ун таяк самаһы ары. Ярты сәгәт самаһы үтеү.* ■ *Беҙҙең класта бер катын бар ине. Утыҙ биш йәштәр самаһы ине уга.* С. Агиш. *Әсәһе кыҙына: «Бер аҙна самаһы ситтә йөрөп кайт»,— тигән* (Әкиәттән).

**2.** Эш-хәл, тәртип, ҡылыҡтың мөмкинлек менән билдәләнгән бер үлсәме. *Сама белеү. Самапан сыгыу.* ■ *[Моратша:] Һин атай кеше уҙ самаңды самаларга, уҙ тиңеңде карарга кәрәк ине.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Нимәлер эшләү-эшләмәү хаҡындағы уй; ниәт, теләк. *Уларҙың [һалдаттарҙың] торорга самалары юк, үлек кеүек йоклайҙар.* Д. Юлтый. *[Сәлих:] Һинең бик эреләнергә самаң бар. Йәнәһе һин генә эшлекле кеше лә, һин генә донъя кыйратаһың.* С. Агиш.

♦ **Бер сама** күпмелер бер күләм; бер аҙ. *Бер сама булыу. Бер сама калыу.* ■ *Йорттоң капкаһы бер саманан ары асылмай.* Ғ. Аллаяров. **Самаһыҙ сапатай** *кар.* **сапатай.**

● *Ашка ла бар бер сама.* Әйтем.

**САМАЛАУ** *к.* **1.** Нимәнеңдер яҡынса үлсәмен, самаһын билдәләү. *Көстө самалау. Самалап булеү.* ■ *Ҡояшта кыҙынып торганда, уҙебеҙҙең йоклаган вакытты самаланым.* Д. Юлтый. *Ҡадир кулдәкте уҙ иңенә һалып, самалап караны.* Б. Бикбай. *Ҡара иçәп менән генә самалап караган был: меңдән артык киçәк ит килә.* / Үлсәмен, самаһын белеү. *Самалап ашау.* ■ *Мәгфурә иренең иçереп китеүенән куркып: — Йә, һин самалап кына. Юкһа, ашай ҙа алмай йоклап кала торганһың,— тине.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡарттар әйтә: «Ялбыр кустым, малыңды самалабырак тот, бөләһең бит»,— ти* (Әкиәттән).

**2.** Эш-хәлдең мөмкинлеген ҡарау. *Аҡсаңа самалап кейем алыу.* ■ *Студент кеçәһенә самалап костюм таба алманы.* Р. Низамов. *Ат ярһыган. Сана оса. Кусер егет, һин самала.* М. Кәрим.

**3.** Ниҙер эшләү-эшләмәү хаҡында уйлау, ниәт итеү. *Бабайҙың һөйләргә самалаганын һиҙеп, балалар шым булды.* Ф. Иçәнғолов. *Йүгерә малай, тайҙы тотоп эйәрләргә ул самалай.* В. Әхмәҙиев. / Ниҙер эшләү яғын ҡарау. *[Хисамый:] һинең кеүек егет сагым булһа, билләһи, шул кыҙҙы самалар инем.* Б. Бикбай. *Алгы рәттәр касыу ягын самалай ине инде.* Ғ. Лоҡманов.

**САМАЛАШЫУ** *к.* Үҙ-ара һәр кемдәге мөмкинлекте һынау; һынашыу. *[Илгиз:] Әйҙә, Алма, булдыра алһаң, кыуып кара мине. [Алма:] Йә, самалашып карайык.* К. Ибәтуллин.

**САМАЛЫ** *с.* **1.** Һан, күләм яғынан сикле булған, етеңкерәмәгән. *Бесән самалы быйыл. Самалы ерҙең ашлыгы ла самалы булды.* ■ *Вакыт ягы булһа ла бик самалы, кулыбыҙга кәләмташ алмак булдык, кош телендәй сәләм хат яҙмак булдык.* М. Кәрим.

**2.** Материаль яҡтан тейешле дәрәжәлә булмаған, нимәлер етмәгән. *Самалы тормош. // Самалы гына донъя көтөү.*

**3.** Кимәл яғынан тейешле дәрәжәлә булмаған, ниндәйҙер кәмселеге булған. *Самалы акыл. Самалы белем. // Самалы белеү. Самалы гына фекер йөрөтөү.* ■ *Ҡыҙ телгә шәп тә, эшкә бик*

*самалы.* Н. Мусин. / Тейешенсә булмаған, насарланған. *Ологайгас, һаулык самалы булды.*

● *Башы салмалы, акылы самалы.* Әйтем.

**САМАН** *и* **1.** Күп итеп һалам ҡушып баҫҡан төҙөлөш балсығы. *Самандан өй һалыу.* ■ *Өйҙәр күберәк самандан эшләнгән.* К. Мәргән.

**2.** (*йәки* **саман кирбес**) Шул балсыҡтан һуғылған эре кирбес. *Саман өй.* ■ *Ялан як булгас, урман-агас юк. Өйҙәрҙең күбеһе кәҫтән йәки саман кирбестән һалынган.* Ғ. Дәүләтшин.

**САМАСА** *р.* **1.** Сама (1 мәғ.) менән, яҡынса. *Самаса белеү.* ■ *[Һатыусы:] Тауар хакын самаса гына түгел, дөрөҫ итеп куя беләбеҙ.* Б. Бикбай.

**2.** Бер аҙ, күпмелер; уртаса, бер сама. *Ҡар катыш ямгырҙан һуң көн дә самаса йылы.* С. Кулибай. *Веселкала әлегә самаса тыныс. Фашистар бында оҙакка тукталмай.* Д. Бүләков. *Б. Бикбайҙың .. әҫәрҙәре самалы һәм самаса булманы.* Ғ. Хөсәйенов.

**САМАУЫР** [*рус.* самовар] *и.* Сәйгә һыу ҡайнатып, һемәгенән яһап эсә торған махсус һауыт. *Еҙ самауыр. Тампак самауыр. Самауыр ҡапкасы. Самауыр тоягы. Самауыр һемәге. Самауыр тоткаһы. Самауыр селтәре. Самауыр ҡайнатыу.* ■ *Усактан эре-эре ҡуҙ алып, самауырга һалып торган Емештең ҡулынан ҡыҫҡысы төшөп китте.* З. Биишева. *Гөжләп торган самауырҙың түбәһендә мин гүйәки пар-быу кергән сәйгүн булам.* Ш. Бабич. **Самауыр баҫырғыс** *диал.* түбәсәй. **Самауыр ҡуйыу** самауыр ҡайнатыу. *Самауыр куйҙым кумерһеҙ, кайнап сыгыр кумерһеҙ* (Халыҡ йырынан). **Самауырҙы терелтеү** һүнгән йәки һүнеп барған самауырҙы кире ҡайнатыу. **Самауырҙы яңыртыу** самауырға һыу һалып, яңынан ҡайнатыу. *Кешене оҙатып бөткәс кенә Муйыл сак бушап, самауыр яңыртып, үҙ гаиләһе менән сәй эсергә ултырҙы.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Самауыр ултырткыс** сыуалға оҡшаған мөрйәле соҡалаҡ.

**САМАУЫРСЫ** *и.* **1.** Самауыр ҡайнатып, сәй әҙерләп торған хеҙмәтсе.

**2.** Самауыр йүнәтеүсе.

**САМАҺЫҘ** *с.* Саманан тыш; бик ҙур, бик күп. *Самаһыҙ кыланыш. // Самаһыҙ ҙур. Самаһыҙ күп. // Еләк быйыл самаһыҙ үҫте.* ■ *Б.Бикбайҙың саманы белмәгән йөрәге актык типкәндән һуң, әйтеп бөтмәгән самаһыҙ һүҙҙәре калһа ла, әйтелгәндәре, халыкка еткәндәре самаһыҙ алтын ул.* Ғ. Хөсәйенов. *Ҡанат йәйгән самаһыҙ ҙур ҡошка оҡшай Урал тауы.* М. Кәрим.

**САМБАТ** *и. диал.* Селбәрә.

**САМБИ́СТ** [*рус.*] *и.* Самбо көрәше менән шөғөлләнгән спортсмен. *Юнир баштан ук шуны аңланы: оҫта самбист булыу өсөн көс кенә түгел, ә йылгырлык та, таһыллык та кәрәк.* Т. Килмөхәмәтов.

**СА́МБО** [*рус.*] *и.* Ысын һуғыш ысулдарын ҡулланған спорт көрәше һәм үҙеңдән көслөрәк йәки ҡоралланған кеше менән алышҡанда ошо көрәш ысулын ҡулланып һаҡланыу сараһы. *Самбо секцияһы. Самбо ярышы.* ■ *Башкорттарҙа көрәш борон-борондан булган. Унда самбо көрәшенең бөтә элементтары булмаһа ла, иң кәрәктәре бар.* Т. Килмөхәмәтов.

**САМБУСА** *и.* Үпкә-бауырҙан бешергән ваҡ бәлеш. *Самбуса бешереү.* ■ *Марфа сәй янына куйыла торган .. самбусаны ла, сейәле майҙы ла, корот, ҡакты ла уйлап алды.* С. Агиш.

**САМИҒ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Уҡыу йортонда ирекле тыңлаусы. *Рәсми шәкерт булып укыуҙы ташлап, калган ике йылды самиг булып үткәрҙем.* М. Ғафури.

**САМИМИ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Саф, асыҡ күңелле, ихлас. *Самими киәфәт.* ■ *Индрилдең кәйефле сагына осраһаң, ул гәжәп һүҙсән, мөләйем һәм самими була.* Д. Юлтый. *Кешегә әҙәп өйрәтеп, үҙе әҙәпһеҙ булган, кешене хеҙмәткә сакырып, үҙе хеҙмәт һөймәгән яҙыусы самими яҙыусы түгел.* С. Ҡудаш.

**САМИМИЛЫҠ** *и.* Саф, асыҡ күңеллелек; ихласлыҡ. *Сабыйҙарса самимилык менән әйтелгән һүҙҙәрҙе ишеткәс, Геннадий Перфельев та беҙгә кушылып көлөп ебәрҙе.* Ғ. Әхмәтшин.

**САМИМИӘТ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит. кар.* **самимилыҡ.** *Мөхәббәт менән самимиәт бер яктан гына булганда, уның йәнгә аҙык бирә алмаганын төшөндөм.* М. Ғафури.

**САМОГО́Н** [*рус.*] *и.* Бәрәңгенән, ашлыҡтан һ. б. иң ябай ысул менән йортта әҙерләнә торған иҫерткес эсемлек. *Самогон кыуыу.* ■ *Икенсе кружканы каплагас, самогон башка үрмәләй башланы.* З. Хисмәтуллин.

**САМОГОНСЫ** *и.* Йәшерен самогон ҡыуып, шуның менән һатыу итеүсе. *Самогонсыларҙы тотоу эшен комсомол үҙ бурысы итеп алды.* Б. Бикбай.

**САМОДЕРЖА́ВИЕ** [*рус.*] *и.* Батша, монарх, императорҙың сикләнмәгән хакимлығы һәм ошо хакимлыҡҡа нигеҙләнгән дәүләт идара системаһы. *Батша самодержавиеһы. Самодержавие идараһы. Самодержавияга каршы көрәш. Самодержавие королошо.*

**САМОКА́Т** [*рус.*] *и.* Аяҡ менән этеп йөрөтөү өсөн таҡтаға ике тәгәрмәс йәки ролик беркетеп эшләнгән балалар уйынсығы *[Малай:] Карагыҙ әле, карагыҙ, Ғүмәр агай агастан самокат эшләгән.* М. Дилмөхәмәтов.

**САМОЛЁТ** [*рус.*] *и.* Двигатель һәм ҡанат ярҙамында оса торған һауанан ауырыраҡ осоу аппараты; осҡос. *Дүрт моторлы самолёт. Реактив самолёт. Турбореактив самолёт. Хәрби самолёт. Йөк самолёты. Пассажир самолёты. Спорт самолёты. Самолётта осоу.* ■ *Гөрөлдәне мотор һәм самолёт күтәрелде тауҙар өҫтөнә.* Р. Ниғмәти.

**САМОРО́ДОК** [*рус.*] *и.* Металдың (алтын, платинаның һ. б.) тәбиғәттә саф көйө осраған эре бөртөгө йәки киҫәге.

**САМОСА́Д** [*рус.*] *и.* Кеше үҙе сәсеп үҫтереп, йорт шарттарында эшкәрткән тәмәке. *Баксала самосад еҫе аңкыны.* Ғ. Аллаяров. *Михайло карт, күҙҙәрен серт-серт йомоп, самосадын көйрәтеп ултыра.* *Б. Бикбай.*

**САМОСВА́Л** [*рус.*] *и.* Йөк машинаһының үҙе ауҙарыла торған кузовы һәм шундай кузовлы автомашина.

**САМСАНЫУ** *к. диал.* Наҙланыу.

**САМСАРАҠ** *и. диал.* Ҡара төлкө (*ҡар.* **төлкө** 1).

**САМУРАЙ** [*рус.* ⟨*яп.*] *и. тар.* Феодаль Японияла ваҡ дворяндарҙың хәрби ҡатламы. / *һөйл. шелт.* Хәҙерге ваҡытта япон һуғыш суҡмарҙарының агрессив өлөшөн күрһәткәндә ҡулланыла. *1938 йылдың сентябрь аҙаҡтарында Хасан күле эргәһендә япон самурайҙары СССР сиктәрен боҙҙо.* Ә. Әхмәтҡужин.

**САМШИТ** [*фарс.*] *и.* Төрлө ваҡ-төйәк нәмә эшләр өсөн ҡулланылған ҙур булмаған бик ҡаты мәңге йәшел көньяҡ ағасы йәки ҡыуағы. *Самшит урманы. Самшит ҡыуаҡлығы.* // *Самшит үҙағас. Самшит ҡул таяғы.*

**САМЫТ** *и. иҫк.* Күтәренке рух; дәрт, илһам. *Самыт менән эшләү.* ■ *ВКП(б) Ленин байрағы яңы самыт менән елберҙәй.* Х. Ғәбитов.

**САМЫТЛАНЫУ** *и. иҫк.* Күтәренке рух алыу; дәртләнеү, илһамланыу. *Йөрәгендә ташты самытланып, революцияның көслө тулҡыны.* Х. Ғәбитов. *[Таңдыса:] Килгән яуҙы дөмбәҫләп, алҡымланып алышып, ҡарыуын һынап ярышып, самытланып көс алып, кәрен алған ҡулынан.., эй батыр ир, батыр ир, яу ҡайтарған батыр ир.* «Ҡуңырбуға».

**САНА** *и.* Ҡарҙан шыуып бара торған ҡуш табанлы ҡышҡы транспорт сараһы. *Көймәле сана. Тимерле сана. Сана ҡарамаһы. Сана терһәге. Сана табаны. Сана эҙе. Санаға тейәү. Санаға ултырыу. Сананан төшөү.* ■ *Ул арала пар ат егелгән ике сананы сажылдатып, өс кеше килеп туҡтаны.* һ. Дәүләтшина. *Бик оҙаҡ йөрөнө бөгөн Вил тышта сана шыуып.* Ф. Рәхимғолова. **Артлы сана** *йәки* **ауыл санаһы** кеше ултырып йөрөй торған еңел сана. **Бесән санаһы** *ҡар.* **эш санаһы. Бәләкәй сана** бау тағып, кеше һөйрәп йөрөй торған сана. *Бабай бәләкәй сана менән урмандан утын ташыған* (Әкиәттән). **Кашауай сана** *ҡар.* **артлы сана.** *Ҙур көймәле кашауай сананы .. тултырғансы ултырған старшина күренде.* Т. Хәйбуллин. **Ҡор санаһы** юлһыҙ ҡар кистереп йөрөй торған бейек тырнаҡлы сана. *Ҡор санаһына яҡшы сбруй менән бына тигән ат еккән доверенный Әкбәр ш..йлатып килеп, .. уҙып китте.* Т. Хәйбуллин. **Ҡул санаһы** *ҡар.* **бәләкәй сана. Оло сана** ат санаһы. **Сана юлы төшөү** ҡар яуып, сана менән йөрөрлөк юл һалыныу. *Ҡарлы ямғырҙан һуң бер ике-өс көн үттеме-юҡмы — туңдырҙы, .. артынса уҡ ҡар яуҙы, сана юлы төштө.* Ә. Вәли. **Селтәрле сана** тимер селтәр ҡуйып эшләнгән матур артлы сана. *Селтәрле лә сана ай терәкле, был саҡтағы йәштәр йөрәкле* (Халыҡ йырынан). **Эш** (*йәки* **ялан) санаһы** йөк ташый торган йәйенке сана. *Эш санаһы өҫтөнә бер ҡултыҡтай ғына бесән һалып, .. биленән бөкрәйеп [Күсәрбай] ултырған.* Т. Хәйбуллин.

♦ **Ни арба, ни сана** *ҡар.* **арба. Шайтан санаһы** санаға оҡшатып үләндән үрелгән нәмә (йәнәһе, көллөк башына ултыртһаң, уны шайтан алып китә). *Ғәли .. бесәй үләненән шайтан санаһы үреп маташа.* Й. Солтанов.

**САНАЛЫ** *с.* Сана егеп барған (кешегә ҡарата). *Саналы кеше аяҙ, елһеҙ матур ҡыш көнөнөң йәмен, тынлығын боҙғоһо килмәгәндәй итеп, ҡара туның яғаһын ҡаушырып, ҡыңғырауҙың .. көмөш тауыштары аҫтында тәрән уйға батып, түбән ҡарап тик кенә бара.* Ғ. Дәүләтшин.

**САНАМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит. ҡар.* **бот**[3]. *Шәүләһе алдыма баҫҡан — тап илаһи бер санам, шул һүрәт алдында табынып, шатланам, ләззәт алам.* М. Ғафури.

**САНАТОРИЙ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Ауырыуҙарҙы дауалау һәм ял иттереү өсөн тәғәйенләнгән дауалау, профилактика үткәреү ойошмаһы. *Колхоз-ара санаторий. Туберкулёзға ҡаршы санаторий. Балалар санаторийы.* ■ *Художник һүҙен башлай алмай аҙапланғанда, санаторийҙа ял итеүсе өлкән йәштәге бик мөләйем бер ҡатын килеп туҡтаны.* С. Агиш. *Республикабыҙҙа ҡымыҙ менән үпкә ауырыуын дауалай торған бер нисә санаторий эшләй.* «Ағиҙел», 1970, № 12.

**САНБАТ** [*рус.*] *и.* Санитария батальоны. *Яраланған һалдаттарҙы санбатҡа алып китеү.* ■ *Санбат тирәһендә снарядтар йыш ярыла башланы. Бер снаряд палатҡала ҡалған яралылар өҫтөнә төшөп ярылды.* У. Кинйәбулатов.

**САНГВИНИК** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Етеҙ, уйынсаҡ, шат күңелле, хискә тиҙ бирелеп, тәрәнгә китмәй, тиҙ һыуынысан тәбиғәтле кеше.

**САНГВИНИК** *с.* Холҡонда етеҙлек, шат күңеллелек, хискә тиҙ бирелеп, тәрәнгә китмәй, тиҙ һыуынысан сифаты булған. *Сангвиник кеше.*

**САНДАЛ**[1] [*фарс.*] *и. ҡар.* **һандал**[2]. *Тракторсы Тараҫ ҡаты сандалға ҡуйып, тимер киҫә.* И. Насыри.

**САНДАЛ**[2] [*рус.* ⟨*гр.*] *и. ҡар.* **һандал**[3].

**САНДАЛЫЙ** [*рус.* сандалии ⟨*гр.*] *и.* Ҡайыш менән эләктерелә торған үксәһеҙ еңел аяҡ кейеме. *Аяғына сандалый кейгән таҙа малай мөйөштән бороло ла ғәйеп булды.* В. Нафиҡов. *Аяғымда һары туфли, сандалый кейгем килә* (Халыҡ йырынан).

**САНДРУЖИНА** [*рус.*] *и.* Санитария дружинаһы.

**САНДРУЖИНАСЫ** *и.* Санитария дружинаһының ағзаһы.

**САНДЫР**[1] *и.* **1.** Хайуан, мал ҡорһағының сат тирәһендәге өлөшө. *Ҡолтор башлы Ҡолторҙаҙҙың ҡылысынан Ҡуҙыйкүрпәс менгән күк толпарҙың сандыр ите генә яраланды, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** *диал. ҡар.* **сат**[1] **1.** *Аҙыраҡ ял иткәндән һуң торайым тиһә, биле ҡатҡан, сандырҙары ауырта.* Н. Мусин.

**САНДЫР**[2] *с.* **1.** Ит ҡунмаған; ҡаҡса. *Сандыр кәүҙәле кеше.* // *Сандыр күренеү.* ■ *Тәҙрә алдында сандыр буйлы һуҡыр ҡарт пәйҙә булды.* Д. Юлтый. *Бәләкәй кәүҙәле, сандыр тәнле был үҫмер [Муса Йәлил] тирәһендә кеше өҙөлмәй,* С. Агиш.

**2.** *диал. ҡар.* **аҫҡаҡ** 2. *Сандыр йөҙлө кеше.*

**САНИНСТРУКТОР** [*рус.*] *и.* Санитария инструкторы (*ҡар.* **санитария**). *Мин санинструктор. Яралы һалдаттарға беренсе ярҙам күрһәтәм.* К. Кинйәбулатова.

**САНИТАР**[1] [*рус.*] *и.* Дауалау йорттарындағы ауырыуҙарҙы ҡарап тора торған кесе медицина персоналына ҡараған кеше. *Больница санитары.*

*Санитар булып эшләү.* ■ *[Укытыусы:] Балалар, Гөлдәр класта санитар булырға теләй. Нисек? Ул таҙа йөрөрмө, класта таҙалыҡты һаҡлай алырмы?* К. Кинйәбулатова. / Яралыларға теүге ярҙам күрһәтә, яу ҡырынан алып сыға торған кесе медицина хеҙмәткәре. *Ҡыҙыл тәреле сумка аҫҡан санитарҙар үлгән һәм яраланған кешеләрҙе йыйыштыра.* С. Ханов. *Санитарҙар яраһы бәйләнгәндәрҙе двуколкаға тейәй.* Д. Юлтый.

**САНИТАР** [2] [*рус.* санитарный] *с.* Армияла медицина хеҙмәтенә ҡараған, медицинаны хеҙмәтләндергән. *Санитар поезд. Санитар самолёт.* ■ *Эпидемияға ҡаршы көрәшеү өсөн .. санитар бюро ойоштоpола.* «Ағиҙел», 1967, № 8.

**САНИТАРИ́Я** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Дөйөм таҙалыҡты һәм халыҡтың һаулығын һаҡлау саралары. *Санитария пропагандаһы. Санитария һәм гигиена ҡағиҙәләре. Санитария талаптары.* **Санитария батальоны** ғәскәри часть составында медицина хеҙмәтен үтәгән айырым бер подразделение. **Санитария инструкторы** ғәскәри часта һәм медицина учреждениеларында эшләгән махсус әҙерлекле кесе медицина хеҙмәткәре. **Санитария мәғарифы** һаулыҡ һаҡлау органдары үткәргән санитария һәм сәләмәтлек сараларын популярлаштырыу, халыҡ араһында гигиена һәм медицина буйынса белем таратыу эше. **Санитария техникаһы** 1) санитария, гигиена сараларын үткәргәндә ҡулланылған бөтә прибор, ҡоролма, аппараттар; 2) санитария, гигиена сараларын тормошҡа ашырыу менән бәйләнгән бөтә техник белем. **Санитария узелы** санитария, гигиена маҡсатына ярашлы йыһазландырылған бүлмәләр. **Санитария часы** ғәскәри часта (батальон, полк, дивизияла) медицина һәм санитария хеҙмәте.

**САНИТА́РКА** [*рус.*] *и.* Санитар ҡатын йәки ҡыҙ. *Операциянан һуң төндәр буйы керпек ҡаҡмай ауырыу янында кем ултыра? Кем ауырыуҙың сирен уртаҡлаша, ҡайғыһын бүлешә, өмөтөн арттыра? Санитарка.* И. Абдуллин.

**СА́НКЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *юр.* Юғары инстанцияның ниндәйҙер эште башҡарырға мөмкинлекте раҫлап, уға юридик көс биреүе. *Ҡулға алырға санкция. Прокурор санкцияһы. Тентергә санкция.* / *кит.* Хупланған эш, рөхсәт. *Санкция биреү.*

**2.** *юр.* Тәртип боҙған, енәйәт эшләгән кешегә ҡарата дәүләт иҫкәртеү сараһы. *Сифатһыҙ продукция сығарған өсөн санкция. Уголовный суд санкцияһы.*

**3.** Халыҡ-ара хоҡуҡта: үҙенең халыҡ-ара йөкләмәһен йәки халыҡ-ара хоҡуҡ ҡағиҙәһен боҙған дәүләткә ҡарата ҡулланылған йоғонто сараһы. *Агрессор дәүләткә ҡарата санкция ҡулланыу.*

**САНКЦИЯЛАУ** *к.* Санкция биреү.

**САНСКРИ́Т** [*рус.*] *и.* Һинд-европа телдәренә ҡараған боронғо һинд теленең әҙәби яҡтан эшкәртелгән бер төрө. *Санскрит теле. Санскрит яҙмаһы.*

**САНТАЙЫУ** *к. диал.* Янтайыу.

**САНТЕ́ХНИК** [*рус.* сантехник — санитарный техник] *и.* Санитария техникаһы (1 мәғ.) менән эш иткән кеше.

**САНТЕ́ХНИКА** [*рус.*] *и.* Санитария техникаһы (*ҡар.* **санитария**) *Сантехника ҡорамалдары. Сантехника системаһын монтажлау.*

**САНТИМЕ́ТР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Метрҙың йөҙҙән бер өлөшөнә тигеҙ булған оҙонлоҡ үлсәү берәмеге.

**2.** Шул берәмеккә тиң өлөштәр һуғылған оҙонлоҡ үлсәй торған линейка, таҫма.

**САНТИМЕТРЛАП** *р.* Сантиметрҙарға бүлеп, сантиметрҙарға һалып. *Сантиметрлап үлсәү.*

**САНТИМЕТРЛЫ** *с.* Сантиметрҙарға бүлгеләнгән. *Сантиметрлы линейка. Сантиметрлы таҫма.*

**САНУ́ЗЕЛ** [*рус.*] *и.* Санитария узелы (*ҡар.* **санитария**).

**САНЧАСТЬ** [*рус.*] *и.* Санитария часы (*ҡар.* **санитария**). *Яралыларҙы санчасҡа тапшырыу.*

**САНЭПИДСТА́НЦИЯ** [*рус.*] *и.* Санитария һәм эпидемиология станцияһы.

**САҢ** [1] *и.* Ҡаты есемдәрҙең онтаҡ рәүешендәге бик ваҡ өлөшсәләре; туҙан. *Урам саңы. Юл саңы. Саң боркотоу. Саң булып осоу. Саң күтәрелеү. Саң ҡағыу. Саң ҡаплау. Саң ҡуныу.* ■ *Көтөүлектәрҙә үлән йүнләп үҫмәй, саң боркоп ята.* Ғ. Вәлиев. *Эңерҙә генә ямғыр яуып үткәнлектән, юлда саң әҫәре юҡ.* Т. Йәнәби. *Бер ваҡыт ер һелкетеп, саң туҙҙырып, дейеү ҡайтып килә, ти* (Әкиәттән).

◆ **Ҡара саң(ы) әйләнеп ятыу** йәшел үләнһеҙ булыу. *Элекке ваҡытта ҡара саңы әйләнеп ятҡан урамдар ҙа ҡаҙ үләненә,.. алабутаға күмелгән.* Т. Хәйбуллин. **Саң баҫыу** күптән онотолоу, хәтерҙән сығыу. **Саң уйнатыу** *шул уҡ* **ҡойон уйнатыу** (*ҡар.* **ҡойон**). **Саң һурғыс** саңды һурып таҙарта торған өй ҡорамалы.

**САҢ** [2] *и.* Тимер һуғып сығарған тауыш (ғәҙәттә сигнал хеҙмәтен үтәй). *Саң ҡағыу.* ■ *Беҙ иртән саң тауышын ишетеп кенә йоҡонан уяндыҡ.* С. Кулибай.

**САҢ** [3] *окш.* **1.** Ҡаты нәмә менән тимергә һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Саң итеү.*

**2.** Ҡайһы бер ҡош (бөркөт һ. б.) сығарған тауышты белдергән һүҙ.

**САҢ** [4] *и. диал. ҡар.* **саңҡыу** [2]. *Саң тауыш.*

**САҢ** [5] *с. диал. ҡар.* **ҡаҡ** [1] **1.** *Саң ҡая. Саң тау.*

**САҢҒЫ** *и.* Ҡар өҫтөнән шыуа торған кәкес башлы пар таҡта. *Саңғы бауы. Саңғы юлы. Саңғы ярышы. Саңғы шыуыу.* ■ *Оҙаҡ та үтмәне — тауҙарҙан саңғылы ҡыҙылдар килеп төштө, һул яҡтан аттарын көрткә батыра-батыра ҡыҙыл партизандар килеп сыҡты.* Б. Хәсән. *Ниндәй рәхәт ап-аҡ ҡарҙы ярып, саңғы тағып шыуып үтеүең.* Х. Кәрим. **Босҡаҡлы саңғы** табанына босҡаҡ тире ҡағылған тау саңғыһы (артҡа шыумаһын өсөн ҡуйыла). *Ҡаҙаҡтарҙы [Ҡаһымғол] бер яҡ ҡабырғанан бер аҙ кешене босҡаҡлы саңғы менән, икенсе яҡтан шундай уҡ саңғылар менән ебәрә лә үҙе аттар менән ҡыуа* (Хикәйәттән).

**САҢҒЫЛДАТЫУ** *к.* Саң-саң иттереү, саң-саң килтереү. *Саңғылдатып тимер ҡағыу. Саңғылдатып салғы яныу.*

**САҢҒЫРАТЫУ** *к.* Саң [1] күтәрелгәнсә ҡыҙҙырыу (көнгә ҡарата).

**САҢҒЫРТ** [1] *с. диал. кар.* **саңырт** [1]. *Саңғырт буран өрә.* Һ. Дәүләтшина.

**САҢҒЫРТ** [2] *и. диал. кар.* **саңырт** [2] 1. *Көҙгө саңырт. Ҡышҡы саңырт.*

**САҢҒЫРТЫУ** *ҡ. диал. кар.* **саңыртыу** 1. *Саңғыртып тора, рәшә яумаһа ярар ине.*

**САҢҒЫСЫ** *и.* Саңғы менән йөрөгән кеше. *Саңғысылар ярышы.* ■ *Саңғысылар башта ук кыҙыу темп алды.* Б. Бикбай.

**САҢҒЫТЫУ** *ҡ. диал. кар.* **саңыртыу** 1. *Ҡар саңғытып яуа. Саңғытып яуған ямғыр.*

**САҢДАУ** *и. диал. кар.* **саңлау** [2]. *Малды саңдауға туплау.*

**САҢҠ** *оҡш.* Йыртҡыс ҡоштоң яңғырауыҡлы өҙөк тауышын белдергән һүҙ. *Саңҡ итеү.*

**САҢҠАЙТЫУ** *ҡ.* **1.** Ғәҙәттәге хәленән артҡа йәки уңға, һулға ташлау (башты). *Быймасы .. башын уң яҡҡа саңҡайтҡан килеш, хәрефтәрҙе берәмтеклән сығарып, нык баҫып яҙырға тотондо.* Б. Бикбай. *Түштәрен киреп, баштарын саңҡайта тотоп, кама ҡырпыулы, буҫтау тышлы бүркен алға, күҙенә генә төшөрөп, таҡыяһын артҡа соңҡаһын каплай кейеп .. йүгерә-атлай йөрөгән аҙаматтар бар.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Баш кейемен артҡа йәки бер яҡҡа ҡырын төшөрөү. *Ҡолморҙа старшина .. башына ҡамсат бүректе саңҡайтараҡ кейгән.* Т. Хәйбуллин.

**3.** *кар.* **ҡайҡайтыу.** *Юламанов ҡулдарын салбар кеҫәһенә тығып, ыҡсым кәүҙәһен артҡа саңҡайта биреп, ары-бире йөрөргә кереште.* Н. Мусин.

**САҢҠАЙЫУ** *ҡ.* Арҡаны кирегә бөгөп, башты артҡа ташлау. *Саңҡайып ултырыу.* ■ *Көрәшселәрҙең береһе артҡа саңҡая, икенсеһе уның аша осоп, .. ергә барып төшә.* Р. Солтангәрәев. *Саңҡайып ҡараһаң, кәпәсең төшөрлөк бейек ҡаялар...* Ш. Янбаев.

**САҢҠАЙЫШЫУ** *ҡ. урт. кар.* **саңҡайыу.** *Малайҙар .. геүләп үткән осҡостарға саңҡайышып ҡарайҙар.* Х. Түләкәев.

**САҢҠАНЛАУ** *ҡ.* Саңҡайып-саңҡайып баҫыу. *Саңҡанлап атлау.*

**САҢҠАРТАН** *р. диал.* Салҡан. *Саңҡартан йығылды.*

**САҢҠАУ** *с. диал.* Һоноҡ *Саңҡау салғы.*

**САҢҠ-САҢҠ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат саңҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Саңҡ-саңҡ килеү.* ■ *Һәр көн саңҡ-саңҡ итеп аҡсарлаҡтар уйнай Волгала.* А. Игебаев. *Саңҡ-саңҡ ҡына итеп ай ҡысҡырған шоңҡар ҡайтыр тауҙың бөркөтө* (Халыҡ йырынан).

**САҢҠ-СОҢҠ** *оҡш.* Ҡаты нәмә менән яткан тимергә һуҡҡанда сыҡҡан тоноҡ тауышты белдергән һүҙ. *Саңҡ-соңҡ килеү. Саңҡ-соңҡ һуғыу.* ■ *Ғәфурҙәр килеп еткәндә, тимерлектең ишеге, ғәҙәттәгесә, асыҡ һәм унан саңҡ-соңҡ итеп сүкештең ниндәйҙәр тимергә бәрелгәне ишетелеп тора.* М. Садыҡова.

**САҢҠЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Саңҡ-саңҡ иттереү, саңҡ-саңҡ килтереү.

**САҢҠЫЛДАУ** *ҡ.* Саңҡ-саңҡ итеү, саңҡ-саңҡ килеү. *Ҡыйғас болоттар араһында саңҡылдап йөрөгән бөркөт, кәйелеп килеп Утлығая тирәһендәге .. таш башына ҡунды.* Ш. Насыров. *Буран йәки ямғыр булырға булһа, сәүкә саңҡылдап ойошоп, шыҡыйып осоп түбән төшөр.* Һынамыш.

**САҢҠЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. кар.* **саңҡылдау.** *Тауҙар ҡаяһында сал бөркөттәр саңҡылдашып ғүмер итәләр.* Ҡ. Даян.

**САҢҠЫУ** [1] *ҡ. кар.* **саңҡылдау.**

**САҢҠЫУ** [2] *с.* Көслө, яңғырауыҡлы (тауышҡа ҡарата). *Шул мәл ҡолаҡтарына ниндәйҙер бер ҡоштоң саңҡыу тауышы ишетелеп ҡала* (Әкиәттән).

**САҢҠЫУЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Көслө, яңғырауыҡлыға әйләндереү, саңҡыу [2] итеү. *«Кеше көслө» фразаһының өс тапҡыр ҡабатланыуы «Кеше көслө» шиғырын саңҡыуландыра ғына.* Ғ. Хөсәйенов.

**САҢҠЫУЛАНЫУ** *ҡ.* Көслө, яңғырауыҡлыға әйләнеү, саңҡыу [2] булыу. *Заман елдәре шағир лирикаһына көслөрәк ҡағылған һайын уның пафосы саңҡыулан[а барҙы].* Ғ. Хөсәйенов.

**САҢЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Саңлыға әйләндереү, саңлы итеү; саң баҫтырыу, саң менән ҡаплатыу; саңлау. *Бүлмәне саңландырыу. Кейемде саңландырыу.* ■ *Урал тауын саңландырып яуға сабыр ат тыумаҫ.* «Урал батыр».

**САҢЛАНЫУ** *ҡ.* Саңлыға әйләнеү, саңлы булыу. *Саңланған бүлмә. Саңланған кейем.*

**САҢЛАУ** [1] *ҡ.* **1.** Саңлыға әйләндереү, саң баҫтырыу, саң ҡаплатыу; саңландырыу. *Кейемде саңлау.*

**2.** Саңда [1] аунау (ҡошҡа ҡарата). *Ишек алдында тауыҡтар саңлап ята.*

**3.** Көн эҫеһендә күләгәгә йәки еләҫ ергә тупланыу (малға ҡарата). *Зөлхизә .. Ирәндек итәгендә саңлап ятҡан һарыҡ көтөүе янына килгән.* Н. Иҙелбай.

**САҢЛАУ** [2] *ҡ.* Саң [3] иткән тауыш сығарыу; яңғырау. *Ирәмәл өҫтөндә саңлап осҡан сал бөркөт бейек.* Х. Ғиләжев.

**САҢЛАУ** [3] *и.* Көн эҫеһендә мал тупланып ята торған күләгә йәки еләҫ урын; туплау [2]. *Көндөҙ күгәүендән ҡасып ҡайтҡан йылҡы өйөрҙәре ағас араһында саңлау яһап, баштарын береһенең өҫтөнә береһе һалып торалар.* М. Ғафури. *[Ҡуй көтөүсеһе — Ҡуҙыйкүрпәскә:] Инде оҙаҡ бармаҫһың, беҙҙең Күсәр хандың саңлауы булыр.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**САҢЛЫ** *с.* Саң баҫҡан, саң ҡаплаған. *Саңлы бит. Саңлы иҙән. Саңлы кейем.* ■ *[Атлылар] ауылдың күпөлдән ятҡан саңлы тәрән юлын борхолдата-борхолдата урамға тулып киттеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**САҢЛЫҠ** *и.* Саңлы урын. *Ҡул ҡабағындағы саңлыҡта аунап, .. төнө буйы көйөштәрен көйшәп сыҡҡан дөйәләр ялҡау ғына урындарынан ҡуҙғалды.* И. Көҫәпҡол.

**САҢ-САҢ, саң да саң** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат саң [3] иткән яңғырауыҡлы тауышты белдергән һүҙ. *Саң-саң итеү. Саң-саң килеү. Саң да саң тимер ҡағыу.* ■ *Саң-саң итеп әллә салғы яный сағылдарҙа минең һылыуым?* Т. Йосопов.

**САҢ-СОҢ, саң да соң** *оҡш.* Тимергә өҙлөкһөҙ һуҡҡанда сыҡҡан яңғырауыҡлы тауышты белдергән һүҙ. *Саң-соң .. тимер сыңғырауына, ат дағалаусыларҙан арыраҡ, ҡыуаҡлыҡ төбөнән урғылып килгән ҡорос зыңлауы ҡушыла.* Ә. Их-

сан. *Корос һандал саң-соң итә, ә сүкешем тук-тук, ти.* С. Муллабаев.

**САҢ-ТОМАН** *и. йыйн.* **1.** Томан кеүек ҡуйы саң [1]. *Саң-томан күтәреү.* ■ *[Һыуһылыу:] Һинең ырыуҙаштарың саң-томан туҙҙырып бында сабып килә.* «Заятүләк менән һыуһылыу».

**2.** *с. мәғ. күсм.* Пыр туҙышҡан; шау-шыулы. *Саң-томан ыҙғыш.* ■ *Ике көндәш араһында саң-томан талаш сығып барғанда, Әткол бай килеп инде.* Т. Хәйбуллин.

**САҢ-ТУҘАН** *и. йыйн. көс. кар.* **саң** [1]. *Саң-туҙан баҫылыу. Саң-туҙан туҙҙырыу.* ■ *Саң-туҙан күтәреп машина һаман алға тәгәрәй.* К. Мәргән. **Саң-туҙан уйнатыу** *шул уҡ* **ҡойон уйнатыу** *кар.* **ҡойон.**

**САҢ-ҺЕРКӘ** *и. биол.* Иң түбән бәшмәк, ылымыҡ, лишайник һәм юғары мүк һымаҡтар, абағалар һ. б. төҙөлөшлө үҫемлектәрҙең үрсеүе һәм уңайһыҙ шарттарҙа һаҡланып ҡалыуы өсөн хеҙмәт иткән микроскопик бәбәк. *Бәшмәк саң-һеркәһе. Үҫемлектәрҙең саң-һеркә ярҙамында үрсеүе.*

**САҢ-ҺЕРКӘЛЕ** *с.* Саң-һеркә ярҙамында үрсегән. *Саң-һеркәле үҫемлектәр.*

**САҢҺЫУ** *и. диал. кар.* **саңырт** [2].

**САҢЫРТ** [1] *с.* Саң [1] кеүек ваҡ өлөштәрҙән торған. *Саңырт буран.* ■ *Төн елдәре иҫә әкрен генә, саңырт карҙар күсә юл аша.* Д. Юлтый.

**САҢЫРТ** [2] *и.* **1.** Һибәләп, томанлап яуған ваҡ ҡына күҙле көҙгө ямғыр йәки ҡар. *Анау ғына тауҙа бер саңырт бар, әллә ямғыр, әллә ҡар микән* (Халыҡ йырынан).

**2.** *диал. кар.* **саҫҡау** 1. *Саңырт көн. Саңырт һыуыҡ.*

**3.** *диал. кар.* монар 2. *Алыҫта-алыҫта зәңгәр саңыртҡа уранған .. Торатау күренә.* Ж. Кейекбаев.

**САҢЫРТЫУ** *ҡ.* **1.** Томан һымаҡ ваҡ ҡына күҙле булып һибәләү. *Саңыртып ямғыр яуа.*

**2.** *диал. кар.* **саҫҡаулау** 1. *Көн саңыртып тора.*

**3.** *диал. кар.* **монарланыу** 2. *Тау баштары саңыртып тора.*

**САП** [1] *и. иҫк.* Дан, таныҡлыҡ. *Сап ҡаҙаныу.*

**САП** [2] *окш.* Яҫы нәмә менән йомшағыраҡ икенсе бер нәмәгә һуҡҡанда, ауыҙ-иренде йомоп асҡанда һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Сап итеү. Сап иттереп ауыҙҙы асыу. Сап иттереп һуғыу.*

**САП-** *киҫ.* Са- ижеге менән башланған төп сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһе бирә. *Сап-салыш. Сап-сатаҡ.*

**САПАҠ** *с.* **1.** Асыҡ күңелле; алсаҡ, илгәҙәк. *Сапаҡ кеше.*

**2.** Һүҙгә оҫта; сәсән. *Сапаҡ телле Иҙеүкәй, сәсән һүҙле Иҙеүкәй.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

**САПАН** *и.* Йоҡа тауарҙан эсләп тегелгән оҙон еңле киң өҫкө кейем. *Батшай сапан. Ебәк сапан. Йәшел сапан. Бохар сапаны.* ■ *[Кәмәр әбей:] Кунаҡҡа барғанда .. бөркәнергә матур бер сапан йәки елән булһа, бигерәк тә яҡшы булыр ине лә.* Ғ. Дәүләтшин.

**САПАТАЙ:** **самаһыҙ сапатай** артығын ҡыланған, дыуамал кешегә ҡарата әйтелә. *[Гөлйөҙөм — Шәрғиәгә:] Әҙәплерәк булһаңсы, Шәрғиә. Шул хәтле ирһәк булырһың икән, самаһыҙ сапатай.* Я. Вәлиев.

**САПЁР** [*рус.* 〈 *фр.*] Хәрби инженерлыҡ частарындағы хеҙмәткәр. *Иң алдан сапёрҙар бара. Улар юлдарҙы тикшерә.* Ә. Ихсан.

**САПҠЫ** *и.* **1.** Итте, йәшелсәне тапап турай торған ҡорал. *Сапҡы менән ит турау.*

**2.** *диал. кар.* **кәтмән** [1] 1.

◆ **Сәкел сапҡы** йәйелгән тиҙәкте киҫә, киҫәктәргә бүлә торған ҡорал.

**САПҠЫЛАУ** *ҡ. көс.* Үткер ҡорал менән ҡабат-ҡабат һелтәп ҡырҡыу, сабыу, сапҡыслау. *Тимербулат йыландарҙы .. сапҡылап, тураҡлай башлаған* (Әкиәттән).

**САПҠЫН** [1] *с.* Бик шәп сабыусан, етеҙ (атҡа ҡарата); сапҡыр. *Атланырбыҙ ҙа китербеҙ сапҡын туры аттарға* (Халыҡ йырынан).

**САПҠЫН** [2] *и.* Ашығыс хәбәр килтергән кеше; сапҡынсы [1]. *Сапҡын ебәреү.* ■ *Волостан Фатима уҡытҡан ауылға сапҡын килде — ул күрше волостарҙы аҡтар баҫып алыуы тураһында хәбәр килтерҙе.* С. Ханов. *Ат аяғы тауҙа саң борҡотто, сапҡын килде бер көн таң менән.* Р. Ниғмәти.

**САПҠЫН** [3] *и.* Көтмәгәндә яһалған киҫкен һөжүм. *Сапҡын һалыу.* ■ *Йыйыҡҡа бармаҫҡа, ошо тирәләге станцияларҙа ятҡан аҡтарға әленән-әле сапҡын яһап торорға [кәрәк].* Б. Хәсән. *[Сурагол:] Түш кереп, беләк һыҙғанып, бер табандан сапҡын яһап та ҡараныҡ, түрәләрҙе еңә алманыҡ.* Т. Хәйбуллин.

**САПҠЫНСЫ** [1] *и. кар.* **сапҡын** [2]. *[Тоҡан:] Ярай, әҙерләйем бер һыбай ат, хәҙер барып ҡайтһын сапҡынсы.* Х. Ғәбитов.

**САПҠЫНСЫ** [2] *и.* Сапҡында [3] ҡатнашҡан һуғышсы. *Башҡорт иленең .. сапҡынсылары, уҡсылары көс йыя, намыҫ туплана.* Ш. Шәһәр.

**САПҠЫР** *с.* Бик шәп сабыусан, етеҙ (атҡа ҡарата); сапҡын [1], йүгерек. *Сапҡыр ат. // Эй, .. көслө, ҡыйыу батырҙар, атта оҫта сапҡырҙар, тыңлағыҙ минең һүҙемде...* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**САПҠЫС** [1] *и.* Бесән саба торған машина. *Ат сапҡысы. Трактор сапҡысы.* ■ *Трактор ике сапҡысты бер юлы тағып алған да бесән сабып йөрөй.* И. Ниғмәтуллин.

**САПҠЫС** [2] *и. диал. кар.* **кәтмән** [1] 1. *Сапҡыс менән картуф күмеү.*

**САПҠЫСЛАУ** *ҡ. кар.* **сапҡылау.** *Бабай кәмәнең ситен сапҡыслай башлай* (Әкиәттән).

**САПЛЫ** *с. иҫк.* Данлы, таныҡлы. *Ул түбәлә уғын яҙа атмаған, аты ергә ятмаған данлы, саплы Алдар ине.* «Батыршаның хаты».

**САПМАЛАУ** *ҡ.* Аша-аша баҫып, эре-эре һикереп йүгереү. *Сапмалап йөрөп ятыу.*

**САПРЫШ** *с. диал.* Ҡыялаш. *Сапрыш торған йорт.*

**САПСАҠ** *и.* Бейек булмаған киң ағас һауыт (хужалыҡта төрлө кәрәк-яраҡ һалыу өсөн ҡулланыла). *Арбаға йәшелсә баҡсаһынан алынған ҙур мискәләр һәм шундай уҡ ҙур сапсаҡтар ултыртылғайны.* Ә. Вәли. *[Ҡарабай хан] туйға ете сапсаҡ бал ҡойҙо, ете тыу бейә һуйҙы, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**САПСАН** [1] *с.* **1.** Етеҙ, тиҙ хәрәкәтле; йылдам, йылғыр. *Сапсан ат. Сапсан кеше. Сапсан ҡош.*

*Сапсан булыу.* // *Сапсан йүгереү.* ■ *Маруся үҙенең сапсан ҡуҙғалышы, етеҙ ҡулдары менән машина кеүек йәһәт эшләй ине.* Һ. Дәүләтшина. *Ауыҙлыҡлап сапсан толпарҙарын өҙәнгегә баҫты егеттәр.* Р. Бикбаев.

**2.** Эштә, тормошта өлгөр, сос. *[Якуп:] Сапсан, эштә тынғы белмәҫ, йәш, матур тол ҡатын ул [Фатима].* Б. Бикбай. *Илсебикә йомош-юлға сапсан ҡыҙыҡай — йоданы тиҙ килтереп тотторҙо.* К. Кинйәбулатова. *Әбей бик уҫал, бик сапсан булған* (Әкиәттән).

**САПСАН** [2] *и.* Ыласындар ғаиләһенә ҡараған оҙон осло ҡанатлы, тар ҡыҫҡа ҡойроҡло, ҡыҙғылт һары йәки аҡ ҡорһаҡлы, күрәнһыу һыртлы йыртҡыс ҡош. *Сәмәр хандың алты улы сапсан ҡоштарын ҡаҙ тубына сөйөп ебәрә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**САПСАНЛАНЫУ** *ҡ.* Етеҙгә, сапсанға [1] әйләнеү; сапсан булыу.

**САПСАНЛАУ** *ҡ.* Ашығыс ҡуҙғалыу; йәһәтләү. *Гөлбоҫтан сапсанлап өйөн йыйыштырып, иҙәндәрен һеперен алды.* Ғ. Дәүләтшин.

**САПСАУЛАУ** *ҡ. диал.* Тынғыһыҙланыу. *Күңел тигәнең ҡайһы саҡта, теҙгенһеҙ тай-тулаҡ һымаҡ, сапсаулап тора, һис баш бирмәй икән.* Р. Низамов.

**САПСАУЫР** *и.* Сабата һымаҡ итеп үрелгән күн аяҡ кейеме; күн сабата.

**САП-СОП, сап та соп** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат сап иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сикәгә сап та соп һуғыу. Ус менән һыуға сап та соп һуғыу.* ■ *Ауыҙын сап та соп итеп һөйәк мөнйөгән Хажиәхмәт Нигмәтуллаға ҡараны.* Я. Хамматов.

**САПСЫНЫУ** *ҡ.* **1.** *ҡайт. ҡар.* **сапсыу** 1.

**2.** Түҙемһеҙләнеп, алғы тояҡ менән ер соҡоп тибенеү (атҡа ҡарата). *Ҡола ҡашҡа .. бышҡыра-бышҡыра аяҡтары менән сапсынып алды. Был инде тигенгә түгел.* С. Кулибай. *Буҙ толпар сапсынып, ерҙе тырнай торғас, тубығына тиклем ҡаҙып төшкән, ти.* «Алпамыша».

**3.** *күсм.* Риза булмай ярһыу, ҡаршылашыу. *[Ҡарамырҙа:] Илбикә, һин юҡҡа сапсынаһың ихлас менән биргән кәңәшкә.* Х. Ғәбитов.

**САПСЫУ** *ҡ.* **1.** Тырнаҡтарҙы батырып тырнау; тырнап соҡоу; ҡаҙыу. *Сөнәгәт менән бергә саҡтар хәҙер ергә ятып, ер сапсып илаһаң да әйләнеп килмәйәсәк кабат.* Ж. Кейекбаев. *Айыу .. кырмыҫҡа иләүен сапсып, туҙҙырырға керешкән, ти* (Әкиәттән). / Яра тырнау. *[Ярһыған бисәләр] Гөльямалга барып йәбешеләр. Битен сапсып, сәсен өҙгөләргә тотондолар.* Я. Хамматов.

**2.** Түҙемһеҙләнеп, алғы тояҡ менән ерҙе тибеү (атҡа ҡарата). *Көрт кубәйгәс инде йылкылар уләнде тибеп, сапсып ашай алмай.* А. Игебаев. *Күк айғыр, китергә ашыҡҡандай, муйынын дугаландырып, .. туҡтауһыҙ ерҙе сапсып тора.* Р. Низамов.

**3.** *күсм.* Тынғыһыҙланып ярһыу. *Сапсый йөрәк. Уттай дөрләп, туҙа сәсем.* Р. Назаров.

**САПСЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **сапсыу** 1, 2.

**САПТАР** *с.* **1.** Ялы һәм ҡойроғо сал булған ерән (ат төҫөнә ҡарата). *Конюх арыҡ саптар атын ике тәгәрмәсле арбаға егеп, ҡайҙалыр барырға сыҡҡан.* А. Таһиров. *Аҡ ял да ғына саптар ай атымды өпсөндәре юҡ тип һатмағыҙ* (Халыҡ йырынан).

**2.** *и. мәғ.* Шул төҫтәге ат. *Һыбайлы елеп килеп етте. Ҡара тиргә батҡан күк саптарҙың өҫтөнән кубектәр оса.* Һ. Дәүләтшина.

**САПТЫРТЫУ** *ҡ. көс. ҡар.* **саптырыу** [1] 1. *Саптыртып барыу.*

**САПТЫРЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Ҡуш аяҡлап һикертеп, бик шәп йүгертеү (йәнлек, хайуанды). *Атты саптырыу.* ■ *Политруктың аты саптырып барған еренән кинәт кенә өркөп, хужаһын уләнгә атып бәрҙе.* Ә. Ихсан. / Етеҙлеккә ярыштырып йүгертеү. *Оҙамға саптырыу. Бәйге саптырыу.* ■ *Туй яһап, алыҫтан ат саптыралар.* «Алпамыша».

**2.** *көс. ҡар.* **сабыу** [2] 1. *Ныязгол еҙнәм .. мине бында һеҙгә саптырҙы.* Һ. Дәүләтшина. *Эт саптырып барып ҡулгә сумды, ти* (Әкиәттән). *Иптәштәрем, һәйбәт кенә урынлашһаң, телеграмма ебәр, беҙ ҙә саптырып килеп етербеҙ, тинеләр.* И. Абдуллин.

**3.** көс. ҡар. **сабыу** [2] 2. *Саптырып барыу.* ■ *Атына ултырып, саптырып Ғаяз бай килеп етте.* Д. Юлтый. *Әлеүкәй .. ерәнсәгә атланып, ен ҡыҙын алдына ултыртып алған да саптырып ҡайтып та киткән, ти* (Әкиәттән).

♦ **Уҡ саптырыу** уҡ атып ярышыу.

**САПТЫРЫУ** [2] *ҡ. йөкм. ҡар.* **сабыу** [3]. *Мунсала арҡаны саптырыу.*

**САПТЫРЫУ** [3] *ҡ. йөкм. ҡар.* **сабыу** [4]. *Бесән саптырыу. Ит саптырыу. Уракка теш саптырыу.* ■ *Ҡоростан бысаҡ саптырҙым, ҡарағайҙан булды кумере* (Халыҡ йырынан).

**САПТЫРЫУ** [4] *ҡ.* Айғырға ҡушыу, торотторуоу.

**САПТЫРЫУ** [5] *ҡ.* Атылып сығып ағыу. *Венанан ҡан саптыра. Крандан һыу саптыра.* ■ *Ана, иптәшем яраланды. Унын артынан үҙемә лә тейҙе. Аяктан ҡан саптыра.* И. Ғиззәтуллин. *Тир урынына егеттән ҡан саптырған.* Ә. Вахитов.

**САПТЫРЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **саптырыу** [1] 1. *Ат саптырышыу.* ■ *Малайҙар саптырышып арба янына һыпыртты.* Р. Солтангәрәев.

**САПФИР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Зәңгәр йәки күк төҫтәге аҫыл таш; зәңгәр яҡут. *Сапфир кешегә борондан билдәле булған.* Д. Буракаев. // *Сапфир йөҙөк. Сапфир муйынсаҡ.*

**САПЫҠ** *с. ҡар.* **сапсан** [1]. *Сапыҡ ат. Сапыҡ кеше.*

**САПЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Сап-соп иттереү, сап-соп иткән тауыш сығарыу. *Ауыҙҙы сапылдатыу.* ■ *Недосека докладнойҙы ике тапкыр уҡып сыҡты ла, өҫтәлгә һалып, уға сапылдата һуғып ҡуйҙы.* Н. Мусин. *Заһит та, дәртләнеп, усын уска сапылдата һуҡты.* Я. Хамматов.

**САПЫЛДАУ** *ҡ.* Сап-соп итеү, сап-соп иткән тауыш сығыу. *Ауыҙы сапылдап тора.*

**САПЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **сапылдау.** *Сапылдашып ашау. Сапылдашып йөҙөү.*

**САПЫРЛАТЫУ** *ҡ.* Сапыр-сопор иттереү, сапыр-сопор килтереү. *Сапырлатып һыу кисеү.*

**САПЫРЛАУ** *ҡ.* Сапыр-сопор итеү, сапыр-сопор килеү. *Аяҡ аҫты сапырлап ята.*

**САПЫРЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **сапырлау.** *Сапырлашып һыу кисеү.*

**САПЫР-СОПОР** *окш.* Һыу кискәндә, һыуҙа койонғанда һ. б. сыҡкан тауышты белдергән һүҙ. *Сапыр-сопор койоноу. Сапыр-сопор һыу кисеү.*

**САР** [1] *и.* Әйләндереп, балта, бысаҡ үткерләй торған түңәрәк ҡайраҡ. *Сар ташы. Сар әйләндереү.* ■ *Егеттәр .. ике балтаны якшылап сарға тотто.* Ф. Исәнғолов.

**САР** [2] *и.* Ҡуян, төлкө һ. б. һуҡмағы. *Ҡуян сары.* ■ *Аҡ куянкай, меҫкен, сар һала яңы яуған ап-аҡ кар менән* (Халыҡ йырынан).

**САР** [3] *окш.* Әсе итеп ҡапыл ҡыҫҡырған тауышты белдергән һүҙ. *Бала сар итеп калды.*

**САРА** [*фарс.*] *и.* **1.** Нимәнелер бойомға ашырыу, хәл итеү, башҡарыу өсөн ҡулланылған төрлө эш, мөмкин булған юл. *Агротехник саралар. Дауалау сараһы. Тәрбиә сараһы. Һаҡлыҡ саралары.* ■ *Андреев вакиғаһынан һуң карт һалдаттарҙы сафтан алдылар. .. ләкин был сара ғына карт һалдаттар менән унтер-офицер араһында тыуған дошманлыкка сик куйманы.* Д. Юлтый. *Амантай үҙ шиғырҙарында һүрәтләү сараларын бик оҫта куллана белде.* Ғ. Зөлҡәрнәев.

**2.** Нимәнелер хәл итеү хәстәрлеге. *Хужаның бисәһе .. самауыр кайнатып, быларҙың тамағын туйҙырыу сараһына керешә.* Т. Йәнәби. *Яҙ етә бит, ниңә карамайһың ситлегеңдән котолоу сараһын?* Ш. Бабич.

**3.** Нимәнелер хәл итер мөмкинлек, башҡарырлыҡ көс; әмәл, юл. *Сара бөтөү. Сара калмау. Сара эҙләү.* ■ *Серәкәйҙән котолоу өсөн бында берҙән-бер сара — төтөнләү.* З. Биишева. *[Күрәҙә — байға:] Ҡыҙыңдың хәле мөшкөл, шулай ҙа һауыктырыу өсөн бер сара бар. Ҡыҙың бакса ғыҙҙа үҫкән алмағастың көн дә иртән үҙенә окшаған бер алмаһын өҙөп ашаһын* (Әкиәттән).

**4.** Нимәгәлер ирешеү, ниндәйҙер бер эш башҡарыу өсөн хеҙмәт иткән нәмә. *Газета — агитация, пропаганда һәм ойоштороу сараһы. Тел — аралашыу сараһы.* / Нимәнелер башҡарыр өсөн кәрәк булған нәмә; ҡорал, ҡорамал. *Транспорт сараһы. Элемтә сараһы. Эш сараһы.*

**5.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

♦ **Ни сара** ни хәл итәһең, нишләйһең. *Ике көн инде туктауһыҙ намаҙ дауам итә. Ике көн инде муллаға хәйер .. аға. Ләкин ни сара! Саранча күбәйгәндән күбәйә бара.* И. Насыри. *Йырлар йырҙарыңды йырлап бөткәс, кҡтән ергә төшмәй ни сараң?* М. Кәрим. **Сара күреү** 1) нимәнелер бойомға ашырыу хәстәрен ҡарау; ниндәйҙер ыңғай эш эшләү. *Һин минең шул йыйынтыкты баҫтырыу сараһын күр инде..* Р. Ниғмәти. *[Ишбулатов:] Бөгөндән үк баҫыуҙа кар тотоу өсөн щиттар булдырыу сараһын күрергә кәрәк.* Ә. Вәли; 2) шелтә, яза биреү. *Совет власына каршы котко таратып яткан был өлкән кулактың эшенә карата бер сара ла күрмәү Волком тарафынан ыскындырылған ҙур хата ине.* Һ. Дәүләтшина. **Сара юҡ** ни хәл итәһең, бер ни эшләп булмай. *[Фәхри:] Ауырынылар, үлделәр. Сара юк, беҙ духтыр түгел.* Б. Бикбай.

**САРАНЧА** *и. кар.* **сиңерткә** 2. *Саранча тубы. Саранча ябырылыу.*

**САРАТАН** [*ғәр.*] *и.* **1.** (*баш хәреф менән*) *астр.* Зодиактың береһе — Игеҙәктәр һәм Арыҫлан йондоҙлоҡтары уртаһында урынлашкан. *Йондоҙо Саратандың куш булмаҫ.* Аҡмулла.

**2.** Ҡояш календары буйынса дүртенсе айҙың ғәрәпсә исеме (22 июль — 21 август).

**3.** *иҫк.* Ер шарының эҫе тропик бүлкәттәре. *Саратан яктарында эҫе һауа һәм тәбиғи мөхит аркаһында дөгө һәм дурра сәселә.* Ғ. Ғисмәти.

**САРАФАН** [*рус.*] *и.* **1.** Оҙон киң күлдәккә оҡшаған, алдан ҡаптырмалы, еңһеҙ рус халыҡ ҡатын-ҡыҙ өҫ кейеме. *Бесеүле сарафан. Киң итәкле сарафан. Тура сарафан.*

**2.** Еңһеҙ ҡатын-ҡыҙ күлдәге.

**САРАҺЫҘ** *с.* **1.** Ниҙер ҡылырға мөмкинлекһеҙ; әмәлһеҙ. *Миллионер Фазлый Әхмәровты [революция] сараһыҙ хәлгә калдырҙы.* Б. Бикбай. **Сараһыҙҙың көнөнән** бер ниндәй башҡа сара, әмәл, юл ҡалмағанлыҡтан. *Кешегә бер нисә вазифа тапшырыу эште уңышлы башкарыуға камасаулай. Әммә был сараһыҙҙың көнөнән эшләнә.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 9 ғинуар.

**2.** *р. мәғ.* Ирекһеҙҙән, ихтыярҙан тыш; теләһәң-теләмәһәң дә. *Дошман пуляһы Фатиманың уң як биленән үтеп, бөйөрөнән өҫтәрәк ултырған. Доктор .. ашығыс операция яһау кәрәклеген сараһыҙ тип тапты.* Б. Бикбай.

**САРАҺЫҘҘАН** *р.* Башҡаса мөмкинлек булмағандан; ирекһеҙҙән. *Нәфисә, бахыр, сараһыҙҙан тағы Сәфа картка кире кайтты.* И. Көҫәпкол.

**САРАҺЫҘЛЫҠ** *и.* Башҡа сара булмағанлыҡ, ирекһеҙ хәл. *Сараһыҙлык ошо хәлгә төшөрҙө.*

**САРБАЗ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Ябай ғәскәри хеҙмәткәр; һалдат. *Һа! Быҫракка канды Мәңгү түрә! Үс алмак булып, сарбаздарын йыйҙы, яу асты.* «Һуңғы Һартай».

**САРБАЙ** *и.* Туҡмағанда йәки бәлә һалғанда ғауғалап ҡыҫҡырған әсе тауыш. *Сарбай һалыу.*

**САРБАЙЛАНЫУ** *ҡ. ҡар.* **сарбайлау.** *Бына бер вакыт өйҙә ығы-зығы куба. Был кыҙ булмәһенә кушылырға ингән кейәү сарбайлана икән.* Ә. Вахитов. *Ә Гөлбоҫтан өшөп, куркыуынан .. сарбайланып сая тауыш менән сәс толомон услап кыҫкырған.* М. Тажи.

**САРБАЙЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **сарбайлау.** *Сарбайлатып туҡмау.* ■ *[Карлуғас:] Нәмәләребеҙҙе сарбайлатып талап алып киттеләр.* Б. Бикбай.

**САРБАЙЛАУ** *ҡ.* Әсе тауыш менән ғауғалап ҡыҫҡырыу. *Сарбайлап илау.* ■ *Ҡәмәр ишекте бәреп сыкты ла, йөрәге кубып, сарбайлап, күлдәксән урамға йүгерҙе.* Т. Йәнәби. *Ҡарабай ағаһы менән атта каскас, ауырып яткан үгәй әсә ырғып тороп: «Ебәрмәгеҙ ҙә ебәрмәгеҙ, тотоғоҙ ҙа тотоғоҙ!» — тип сарбайлап кыскырып кала* (Әкиәттән).

**САРБАЙЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **сарбайлау.** *Сарбайлашып илау.*

**САРҒА** *с.* **1.** Сарылдап торған әсе (тауышҡа ҡарата); сарылдаҡ. *[Әнисәнең] сарға тауышы бөтә өйҙө яңғырата.* К. Кинйәбулатова. / Әсе тауышлы (ҡошҡа һ. б. ҡарата). *Тынды тауҙар, тынды сарға коштар.* М. Ғәли.

**2.** Сарылдап, сәсрәп торған уҫал (ҡатын-ҡыҙ-

ға ҡарата).— *Ай-һай, сарға ла бисә һуң Нәгимә еңгә.* З. Биишева. / Бик уҫал, йыртҡыс (ҡошҡортҡа ҡарата). *Кәлмәргәндән дә сарға ҡош юҡтыр. Сарға айыу ҡайҙандыр килеп сыҡҡан, тиҙәр.* / *күсм.* Бик ныҡ һыуыҡ, сатнама һыуыҡ (көнгә ҡарата). *Ҡыштың үтә һалҡын, сарға кисе ине был. Сатнап-сәсрәп торған ҡорос ҡар табанды ялмап ята, әсе еле битте, ҡулды көйҙөрә, ҡоро һауа тынды ҡура.* З. Биишева.

**3.** *диал.* Аҫау. *Сарға айғыр.* ■ *[Ҡурташ:] Таһыл ҡоҙа, .. бер айғыр бирәйек, үҙе сарға, төҫө тура ала.* Х. Ғәбитов.

**САРҒАЛАУ** *ҡ.* **1.** Әсе тауыш менән сар-сор ҡысҡырыу; сарылдау. *Сарғалап аҡсарлаҡтар оса.*

**2.** *күсм.* Ут сәсеп, уҫаллашып сарылдау; сарбайлау. *Сарғалап ҡысҡырышыу. Сарғалап талашыу.*

**САРДАР** [*фарс.*] *и. ҡар.* **сәрҙар.** *Ә сардарҙан аҡыл да, хәйлә лә күберәк талап ителә.* Ғ. Ибраһимов.

**САРДИ́НА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Сельдтар ғаиләһенә ҡараған, ашауға яраҡлы ваҡ диңгеҙ балығы.

**САРҘАҠ** [1] *и. диал. ҡар.* **сарлаҡ** [1] 1. *Сарҙаҡҡа менеү. Сарҙаҡта тороу.*

**САРҘАҠ** [2] *и. диал. ҡар.* **сарлаҡ** [2]. *Аҡ сарҙаҡ. Ҡара сарҙаҡ.*

**СА́РЖА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ебе диагональ йүнәлештә һуғылған эслек туҡыма. *Ҡулдәклек саржа. Саржа производствоһы. Техник саржа. Эслек саржа. // Саржа эслек.*

**САРКА́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Кемде йәки нимәнелер бөтөрөп, юҡҡа сығарып баһа биргән әсе мыҫҡыл, көлкө. *Үткер сарказм.*

**2.** Әсе, зәһәр көлөү менән белдерелгән шелтә йәки иҫкәртмә. *Сарказм менән һүрәтләү. Сарказм ҡулланыу.*

**САРКАСТИК** *с. кит.* Сарказмға ҡоролған, сарказм менән һуғарылған. *Саркастик иҫкәртмә. Саркастик әҫәр. // Саркастик йылмайыу.* ■ *«Карт түгел» шиғырында [М. Ғафури] мосолман донъяһының реакцион традицияларын — күп бисә алыу йолаһын саркастик планда һүрәтләгән.* Ғ. Рамазанов.

**САРКО́МА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Һөйәк, тән туҡымаһындағы яман шеш. *Һөйәк саркомаһы.*

**САРКОФА́Г** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Боронғо халыҡтарҙа: таш, ағас йәки башҡа нәмәнән биҙәкләп яһалған табут. *Антик саркофаг. Батша саркофагы. Боронғо Египет саркофагы.*

**САРҠ-СОРҠ** *оҡш.* Өҙөк-өҙөк яңғырап сыҡҡан ҡош тауышын белдергән һүҙ. *Сарҡ-сорҡ итеү. Сарҡ-сорҡ килеү.*

**САРҠЫЛДАҠ** *с.* Сарҡ-сорҡ итеп ҡысҡырған (ҡошҡа ҡарата). *Сарҡылдаҡ аҡсарлаҡ.*

**САРҠЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Сарҡ-сорҡ итереү, сарҡ-сорҡ килтереү.

**САРҠЫЛДАУ** *ҡ.* Сарҡ-сорҡ итеү, сарҡ-сорҡ килеү.

**САРҠЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **сарҡылдау.** *Сарлаҡтар сарҡылдаша.*

**САРЛАҠ** [1] [*фарс.*] *и.* **1.** Түбә менән ҡыйыҡ араһына өйҙән бәләкәйерәк итеп эшләнгән өҫкө ҡат. *Сарлаҡ тәҙрәһе.* ■ *[Усман:] Әйҙә, менәйек тә Сәлим ағайҙың сарлаҡтағы күгәрсендәрен ҡарайыҡ.* Н. Асанбаев. *Сарлаҡтарға менгән шаян ҡыҙҙай, [Ай] һаман урләй күктең түренә.* Д. Юлтый. *Өфөләге ябай ағас йорттоң сарлағында, үрге ҡатында, күп уйланы Ильич ил яҙмышы, зарлы башҡорт йыры хаҡында.* Ғ. Рамазанов.

**2.** *диал.* Бүртлек. *Сарлаҡҡа ҡуйыу. Сарлаҡҡа эләү.*

**3.** Өйҙөң өҫкө ҡаттарынан тышҡа сығарып эшләнгән тирәсле баҫма; балкон. *Егетте кейендерәләр, ҡыҙ менән икеһен сарлаҡҡа алып сығалар. Батша халыҡҡа әйтә: «Бына мин ҡыҙымды ошо егеткә бирәм»,— ти* (Әкиәттән).

**САРЛАҠ** [2] *и.* Балыҡ тибеп, сарылдап осоп йөрөй торған һыу ҡошо. *Аҡ сарлаҡ. Ҡарабаш сарлаҡ. Ҡара сарлаҡ. Мауыҙ сарлаҡ.*

**САРЛАНЫУ** [1] *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **сарлау** [1] 1. *Сарланған балта.*

**2.** *күсм.* Эштә, тормошта уны-быны күп күреп, белеп оҫтарыу; йышылыу, шымарыу. *Шәүәли телгә шәп. Күрәһең, политкаторжандар менән дә аҙ-маҙ аралашҡандыр инде, яҡшы ғына сарланып алған.* Б. Бикбай. *Алдына алған «линия»ны үткәреүҙә Яков етерлек сарланғайны. Ләкин еңеү ләззәтен татыу насип булманы.* Я. Вәлиев.

**САРЛАНЫУ** [2] *ҡ. төш. ҡар.* **сарлау** [2].

**САРЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **сарлау** [1] 1. *Бысаҡ сарлатыу.*

**САРЛАУ** [1] *ҡ.* **1.** Сарға [1] тотоп үткерләү. *Сарланыҡ булат ҡылысты, яндырҙыҡ дошман яуын.* Ғ. Әмири. *Былар [дейеүҙәр] бик үткер итеп балта сарлай* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Күп тәжрибә биреп, күп ныҡып нимәгәлер әҙерләү, оҫтартыу; йышылтыу, шымартыу. *Эшкә ҡулды сарлау.* ■ *Алдан сарлап ҡуйылған бисәләр .. күтәрелде лә китте.* Б. Бикбай. *Илебеҙҙең шаулы йөрәгендә белем менән сарлап аҡылың, уҡы, тырышып уҡы, тиҙерәк инженер бул инде, аҡыллым.* Х. Ҡунаҡбай.

◆ **Тел сарлау** юҡ-бар һөйләп һүҙ көрәштереү. *[Рахман:] Һеҙ, ҡыҙҙар, бында эшләргә килдегеҙме, әллә тел сарларғамы?* Ә. Вәли.

**САРЛАУ** [2] *ҡ.* Сар [2] һалыу; күп йөрөп һуҡмаҡлау (ҡуян, төлкөгә һ. б. ҡарата).

**САРЛАУ** [3] *ҡ. диал.* Сарылдау. *Сарлап илау. Сарлап ҡысҡырыу.*

**САРМАТ** [*рус.*] *и.* Беҙҙең эраға тиклемге 6—4 быуаттарҙа Волга буйы һәм Урал далаларында күсеп йөрөгән, аҙаҡ беҙҙең эраға тиклемге 4—3 быуаттарҙа Ҡара диңгеҙ буйынан скифтарҙы ҡыҫырыҡлап сығарған фарсы телле ҡәбиләләрҙең дөйөм атамаһы. *Сармат ҡурғандары.*

**САРПА́ЙЫУ** *ҡ. диал.* Ярпайыу. *Сарпайып ултырып алған.*

**САРПАҠЛАНЫУ** *ҡ. ҡар.* **сәрпәкләнеү.** *Ағастың .. ҡайыры сыйылып, сарпаҡланып бөткән.* Ғ. Әмири. *Таштар .. күмер төҫлө сарпаҡлана.* М. Ғәли.

**САРПАҠЛАУ** *ҡ. ҡар.* **сәрпәкләү.** *Сыраны сарпаҡлау.* ■ *[Мәктәптең] йоҙағы ватылмаған, ә эстә ҡара таҡта сарпаҡлап ярып ташланған.* З. Биишева.

**САРПАНЛАТЫУ** *ҡ. диал.* Ялпылдатыу, елпелдәтеү. *Ҡолондар ҡойроҡтарын сарпанлатып, йәшел бесәндә ятып ашай.* Б. Бикбай.

**САРПАНЛАУ** *ҡ. диал.* Ялпылдау, елпелдәү.

**САРПЙНКА** [*рус.*] *и.* Буйлы йәки шаҡмаҡлы йоҡа кизе-мамыҡ туҡыма. *Сарпинка күлдәк. Сарпинка салбар.* *Сарпинка күлдәк. Сарпинка салбар.*

**САРПЫ** [*гәр.*] *и.* Бәләкәй бер киҫәк; осмот. *Осҡондан бер сарпы.*

**САРПЫЛЫУ** [1] *ҡ.* Ваҡ-ваҡ булып, буй-буй ярылыу, сәрпәкләнеү. *Һалдат бәләкәй генә крәҫтиән өйөнөң снаряд ярсыҡтары менән сарпылған түпһаһына ултырған да, кителогынан ҡатыҡ эсә.* Н. Иҙелбай.

**САРПЫЛЫУ** [2] *ҡ. ҡар.* **сайпылыу** 2.

**САРПЫЛЫУ** [3] *ҡ. ҡар.* **сарпыу** [3] 2. *Ен еле сарпылыу.*

**САРПЫНДЫ** *и.* Ярсылып сыҡҡан бер киҫәк. *Ағас сарпындыһы.*

**САРПЫУ** [1] *ҡ.* Ваҡ-ваҡ итеп, сыралап ярыу. *Ҡот осҡос уй, йәшен кеүек, уның мейеһен сарпып үткәндәй булды.* Ф. Иҫәнғолов. *Ҡарағастарҙы сарпып, яргыслап, сатын-сатҡа айырып, арҡыс та торҡос йығып бөттө.* «Ҡуңырбоға».

**САРПЫУ** [2] *ҡ.* **1.** *ҡар.* **сайпыу.** *Ишкәк менән һыуҙы сарпыу.*

**2.** *күсм.* Килеп тейеү, яралау. *Нисә ярсыҡ тәнең йыртманы, нисә пуля сарпып йыҡманы.* С. Кулибай.

**САРПЫУ** [3] *и.* **1.** Ниҙеңдер зыянлы тәьҫире, шауҡымы. *Йәшен сарпыуы. Һуғыш сарпыуы.* ■ *Ғ. Сәләмдең үлеме бер башҡорттар өсөн генә түгел, туғандаш татар халҡына ла сарпыуын ҡағылдырҙы.* Б. Бикбай. *Ә беҙгә йәшен шарынан бер нәмә лә булманы, сарпыуы ла ҡағылманы.* Ғ. Ишбулатов.

**2.** Иҫке хөрәфәтсә, ен ҡағылғандан килгән ауырыу. *Сарпыу ҡағылыу.*

**САРСАР** [*гәр.*] *и. иҫк.* Ҡышҡы һыуыҡ әсе ел. *Сарсар бураны. Сарсар һыуығы.*

**САРСАТЫУ** *ҡ.* **1.** Бик ныҡ һыуһатыу. *Килер бер көн, иренегеҙҙе сылатырға ла һыу бирмәй сарсатырбыҙ.* Т. Хәйбуллин. / Бик ныҡ киптереп, ҡорғаҡһытыу. *Ҡояш ҡыҙыуы ерҙе лә сарсатҡан.*

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **сарсау.** *Бик ныҡ сарсатты.*

**САРСАУ** *ҡ.* Бик ныҡ һыуһап, кибегеү. *Сарсап, һыу һорау.* ■ *Көн тын алғыһыҙ эҫе ине. Һыуһап, сарсап, төшкөлөккә туҡтаныҡ.* Й. Солтанов. *Сарсайым һуң ниңә был доньяла, һыуһындарым бер ҙә ҡанмайһың.* Т. Йосопов. / Бик ныҡ кибеү, ҡорғаҡһыу. *Ҡайҙа ғына ҡарама — һыуһыҙлыҡтан сарсаған сахралар.* Н. Иҙелбай. *Борсаҡ яуып .. королоктан сарсаған ерҙә ҡалҡып сыҡҡан һирәк-һаяк зәгиф ашлыҡтарҙы ла, салғы менән сапҡандай тураклай, ҡара батҡаҡҡа бутай.* Ф. Иҫәнғолов.

**САРСАУЛАУ** *ҡ. ҡар.* **сарсау.** *Сарсаулаған аттар бышҡырҙылар, маңлайҙарын өйкәп ҡапҡаға.* М. Тажи.

**САР-СОР, сар ҙа сор** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат сар [3] иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сар-сор итеү. Сар-сор килеү. Сар-сор ҡысҡырыу.* ■ *Аҡсарлаҡтар сар-сор аҙыҡ аулай, һыу таҙарта шаулап түлҡындар.* Т. Ҡарамышева.

**САРСЫҠ: сарсыҡ булыу** бала артҡа саңҡайып, тартышып илаған да эйтелә (йәнәһе, ен-елпеү һуғылғандан була).

**САРСЫЛЫУ** *ҡ. диал.* Ярсылыу. *Бурәнә шытырланы, сарсылды һәм урталай ярылды.* Я. Хамматов.

**САРТ** [1] *оҡш.* Йоҡа ҡаты нәмәне ҡапыл һындырғанда, йәбешкән нәмәнән ниҙелер тартып алғанда, сыбыртҡы осо шартлағанда һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Сарт итеү. Сарт иттереү.*

**САРТ** [2] *р. диал. ҡар.* **сат** [2]. *Сарт йәбешеү.* ■ *Шыуып китһәң, таш ни, һин ни, .. сарт йәбешәм таштарыма.* С. Ғәбиҙуллин.

**САРТ** [3]**: сарт һыныу** *диал.* сурт һыныу (*ҡар.* **сурт**).

**САРТЛАТЫУ** *ҡ.* Сарт иттереү, сарт-сорт килтереү. *Сартлатып һындырыу. Сартлатып ярыу. Сартлатып һағыҙ сәйнәү. Телде сартлатыу.*

**САРТЛАУ** [1] *ҡ.* Сарт [1] итеү. *Сартлап һыныу. Сартлап ярылыу. Сәйнәгәндә һағыҙы сартлап тора* ■ *Йәһәннәм мейестәре сартлап, гөрләп яна башланы.* Ш. Шәһәр.

**САРТЛАУ** [2] *ҡ. диал. ҡар.* **сатнау** [1] 1. *Йылғаның боҙо сартлаған инде. Тәҙрәнең быялаһы сартлаған.*

**САРТ-СОРТ, сарт та сорт** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат сарт [1] иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сарт-сорт итеү. Сарт-сорт килеү. Сарт-сорт һыныу. Сарт-сорт төкөрөү.* ■ *Сара сарт-сорт килтереп .. һағыҙ сәйнәй.* С. Агиш. *Сыбыртҡыһын сарт-сорт шартлатып, Солтан ағай көтөү ҡыуып сығып бара.* Я. Вәлиев.

**САРФАТ** *и. диал.* Һаҡсыллыҡ. *Сарфат менән тотоноу.* ■ *Өҫ-башты сарфат менән кейеү кәрәк.* М. Тажи.

**САРФАТЛЫ** *с. диал.* Һаҡсыл. *Ул бик сарфатлы кеше.* // *Сарфатлы тотоноу.*

**САРФАТҺЫҘ** *с. диал.* Бәрәшән. *Ҡәйнәм сарфатһыҙ түгел, һәр нәмәнең ҡәҙерен белеп, бөртөкләп йәшәй.* М. Садыкова. *Булғанға күрәме баҙнатһыҙ, булмағым тормошта сарфатһыҙ.* С. Кулибай.

**САРФЫУ** *и.* Нимәнеңдер ауыр шауҡымы, эҙемтәһе. *Оҙаҡ ауырыу Мостай Кәримдең ижадына ла сарфыуһыҙ ҡалманы, .. уның күпме ҡәҙерле йылдарын йотто, аҙмы тыуыр шиғырҙарын урланы.* Ғ. Хөсәйенов. *Ил өҫтөнән, ир яҙмышынан шундай дауылдар үтә — уларҙың сарфыуы .. кешеләрҙең выжданын газаплай, рухын иңрәтеп тора.* Ә. Хәкимов.

**САРЫ** *бәйл. диал.* Тиклем. *Төштән һуңға сары көттө.*

**САРЫЙ-СОРОЙ** *оҡш. диал.* Сар-сор. *Алда кемдәрҙеңдер сарый-сорой килгәнен ишетеп, туҡтап ҡалдыҡ.* Н. Мусин.

**САРЫҠ** *и.* Башы күндән, ҡуныс туланан тегелгән аяҡ кейеме. *Сарыҡ ҡыҫмауы. Сарыҡ олтарыу.* ■ *Уларҙың өҫ-баштары бер төрлө: ҡолаҡсын бүрек, ҡалын тула ҡунысын түбыкка тиклем тартып бәйләгән сарыҡ ҡата.* Я. Хамматов. *Шунда ла торған кейәүегеҙ аяғына кейгән аҡ сарыҡ* (Халыҡ йырынан). **Ҡоба сарыҡ** эшкәртелмәгән йылҡы тиреһенән тегелгән сарыҡ.

◆ **Сарыҡ һабаҡ** *диал.* итек-сарыҡ тегә торған киндер еп.

**САРЫЛДАҠ** *с.* Сар-сор ҡысҡырған. *Сарылдаҡ ҡатын.* ■ *Шунда бәләкәй генә буйлы бер*

*һалдат сарылдаҡ тауыш менән Федорҙы бүлдерҙе.* В. Исхаҡов.

**САРЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Сар-сор иттереү, сар-сор килтереү. *Сарылдатып алып килеү. Сарылдатып баҫтырыу. Сарылдатып туҡмау.*

**САРЫЛДАУ** *ҡ.* Сар-сор итеү, сар-сор килеү. *Сарылдап ҡысҡырыу.* ■ *Тимер мейестең ике яғына баҫҡан ике ҡатын сарылдап эрләшә.* А. Карнай. *Сәмрегош түңәрәтеп осоп йөрөй, үҙе сарылдай икән, ти* (Әкиәттән).

**САРЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **сарылдау.** *Сарылдашҡан тауыш. Сарылдашып илау.*

**САРЫУ** *ҡ.* **1.** Күп йөрөп һуҡмаҡлау; сарлау [2]. *Ир егеткәйҙәрҙең ай ҡукрәгән дошмандары сарып, юл һалмаҫ* (Халыҡ йырынан).

**2.** Бауҙы арҡыс-торҡос элэктереп тартыу; сырмау. *Йөктө сарып бәйләү.*

♦ **Кәләп сарыу** *шул уҡ* **кәләп һалыу** (*ҡар.* **кәләп** 1).

**САРЫФ** [1] [*ғәр.*] *и. иҫк.* Морфология. *Башҡорт теленең сарыфы. Сарыф уҡытыу.* ■ *[Хәҙрәт:] Уҡырға ҡәбилиәтең бар төҫлө күренә. Һиңә сарыф, нәхеү уҡырға кәрәк.* М. Ғафури.

**САРЫФ** [2] [*ғәр.*]: **сарыф итеү** (*йәки* **ҡылыу**) кем йәки нимәләр файҙаһына тотоноу, ҡулланыу. *Аҡса сарыф итеү. Ваҡытты сарыф итеү. Эшкә ғүмерҙе сарыф итеү.* ■ *Нәгимә ҡыҙы өсөн бар йәшлеген сарыф итте.* Б. Бикбай. *Беҙ йөҙ кешенән торған отрядты ойоштороорға .. күпмелер ваҡыт сарыф итмәй мөмкин түгел.* Ә. Усманов.

**САРЫФЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **сарыфлау.** *Сарыфланған аҡса. Сарыфланған ваҡыт.* ■ *Гөлнисаның күңеле, яҙғы сәскә һымаҡ асылып, сарыфланмаған бөтә наҙын, ләүкеп киткән керһеҙ хистәрен Мансурға бирҙе.* Ә. Хәкимов.

**САРЫФЛАУ** *ҡ.* Кем йәки нимә файҙаһына тотоноу, ҡулланыу, сарыф итеү.

**САРЫШ** *и.* Ҡыпсаҡ ҡәбиләһенә ингән бер башҡорт ырыуының исеме.

**САСАҠ** *и. диал.* **1.** *ҡар.* **сәсәк** [2]. *Таҫтамал сасағы. Шәл сасағы.*

**2.** *ҡар.* **сәсә** [1]. *Аттың бәкәлендә сасағы бар.*

**САСҠАУ** *и.* **1.** Томанлап торған ҡаты һыуыҡ. *Көҙгө сасҡау. // Сасҡау көн.* ■ *Тышта ғәҙәттән тыш сасҡау булғанлыҡтан, мин өшөп ҡайтып ингәйнем.* С. Кулибай. *Быны тағы Вахитовты ҡышҡы сасҡау көндәрҙең береһендә райком бюроһына саҡырттылар.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Ҡышҡы һыуыҡта ҡунған ҡырау; бәҫ. *Сасҡау баҫыу.* ■ *Урман сасҡау бөркәнеп, ап-аҡ булып ултыра.* Ф. Иҫәнғолов. *Ә тышта ҡыш. Сасҡау, мәрйен булып, ҡайын ботағына бәйләнә.* Р. Назаров.

**САСҠАУЛАУ** *ҡ.* **1.** Томанлап, ныҡ һыуытыу. *Көндәр сасҡаулап торҙо ла ҡапыл һындырҙы.* Я. Вәлиев.

**2.** Бәҫ менән ҡапланыу (ҡышҡы һыуыҡта); бәҫләнеү. *Ботаҡтар сасҡауланған. Бүрке сасҡауланып ап-аҡ булған.*

**САТ** [1] *и.* **1.** Бот төбө менән ҡорһаҡ аҫтының араһы.

**2.** Буй-буй килеп, ике йәки бер нисә нәмә тоташҡан урын. *Урам саты. Юл саты.* ■ *Саттан боролғанса артыма ҡарап барҙым.* М. Ғафури. *Таң яҡтыра башлауға беҙ ике йылға сатындағы алты мөйөшлө .. йорт янына килеп туҡтаныҡ.* С. Кулибай.

**3.** Бер төптән айырылған тармаҡ; сата. *Ағас саты. Сәнске саты.* ■ *Һәнәктең саты айырылды.* Р. Низамов.

♦ **Саты асылыу** тауыҡтың йомортҡа һалыр ваҡыты етеү. **Саты бөрөшөү** тауыҡ йомортҡа һалыуҙан туҡтау.

**САТ** [2] *р.* Бик ныҡ итеп. *Сат ҡаршы төшөү. Сат йәбешеп уҡыу.* ■ *Ғилман ҡаяға сат йәбешеп тора.* З. Биишева. *Рәхмәтулланы күргәс, Дәүләтҡол уға сат йәбеште: — Әйҙә, ҡорҙаш, миңә инеп сығайыҡ. .. Доньямды күреп китерһең.* Я. Вәлиев.

**САТ** [3] *окш.* Ус менән сикәгә йәки асыҡ тәңгә һуҡҡанда, телде аңҡауҙан ҡапыл айырғанда һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Хөмәйрә .. башына сат иттереп сәпәне.* Ф. Иҫәнғолов.

**САТ** [4] *киҫ. диал. ҡар.* **тас** [4]. *Сат атаһы инде. Сат бүре төҫлө эт.*

**САТА** *и.* **1.** Нимәнеңдер бер төптән сыҡҡан йәки барыһы бер тиң булған тармағы; аса. *Ағас сатаһы. Һәнәк сатаһы.*

**2.** Тармаҡлы ағастан яһап, төрлө кәрәккә яраҡлаштырылған нәмә. *Ыңғырсаҡ сатаһы. Һабан сатаһы. Өйҙө сатаға ҡыҫтырып яндырған сыра менән яҡтыртҡандар.*

**САТАЙ-БОТАЙ** *с.* **1.** Тейешле тәртип, симметрия, пропорция ҡағиҙәләренә тура килмәгән, тәртипһеҙ хәлдә; сатаҡ-ботаҡ. *Сатай-ботай почерк. Яҙыуы сатай-ботай. // Сатай-ботай ятыу.* ■ *Хаттың ситенә Егор сатай-ботай хәрефтәр менән: «Йәйҙе көткән эт кеүек, һинән яуап көтәбеҙ!» тип яҙып ҡуйған.* Х. Мохтар. *Шулай ҙа уҡыу йылы бөткәндә, сатай-ботай итеп булһа ла, исем-фамилиябыҙҙы яҙа белеү бәхетенә ирештек.* М. Тажи.

**2.** *күсм.* Рәте, сираты булмаған, нисек етте шулай. *Сатай-ботай тормош.* ■ *Мин уҡыуҙы ташларға булдым. Дәрестәргә әҙерләнмәй йөрөй башланым. Бөтәһе лә сатай-ботай китте. Тормош һырты менән әйләнде.* Ә. Әхмәткужин. *Йәш ғүмеркәйҙәрҙе уҙмай тиҙәр, сатай-ботай барып уҙа икән* (Халыҡ йырынан).

**САТАҠ** [1] *с.* **1.** Саталанып торған, саталы. *Тауҙан аҫҡа сабып килә сатаҡ мөгөҙ ҡоралай.* Ш. Бикҡол. *Тупаҡ ҡойроҡ бүреле, сатаҡ мөгөҙ боланлы.., ай Уралым, Уралым.* «Ҡараһаҡал».

**2.** *күсм.* Кәмселекле, етешмәгән. *«Әйәле башымды» тигән шиғырым идея-художество йөкмәткеһе яғынан сатаҡ әҫәр булып сыҡты.* Р. Ниғмәти.

**САТАҠ** [2] *и.* Кәмселекле яҡ, етешһеҙлек. *Тормошомдоң булған сатаҡтарын шағирлыҡтан ғына күрҙең һин.* Н. Нәжми.

**САТАҠ-БОТАҠ** *с. ҡар.* **сатай-ботай** 1.

**САТАҠЛЫҠ** *и.* Кәмселек, етешһеҙлек. *Цех коллективы производство ритмына сатаҡлыҡ индерергә маташыусыларға ҡаты иҫкәртеү яһаны.* Ә. Байрамов. *Икенсе етешһеҙлек итеп, хатта һәйбәт шиғырҙарҙа ла осрай торған ритмик сатаҡлыҡ тураһында әйтке килә.* Ә. Хәкимов.

**САТАЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Сата (1 мәғ.) рәүешендә итеү, саталы итеү, саталау. *[Ғариф:] Тимербулат иптәш Янһаровка доклад өсөн һүҙ би-*

*рәм,— тине һәм, ике кулын күкрәге аша саталандырып куйып, башын артҡа ташлап, ултырғыска саңҡайып ултырҙы.* Б. Бикбай.

**САТАЛАНЫУ** *к.* Саталы булыу, сата (1 мәғ.) рәүешендә булыу. *Сataланып тороу. Сataланып үҫеү.*

**САТАЛАУ** *к.* Саталы итеү, сата рәүешендә итеү; саталандырыу. *Антеннаны ҡороп, саталап ҡуйыу. Өс саталап һәнәк эшләү.*

**САТАЛЫ** *с.* Сataланып торған, сатаһы (1 мәғ.) булған. *Саталы бағана.* ■ *Йырткыс [айыу], капканды ыҫҡындырмаҡ булып, саталы ағас араһында аяғын тартып маташа.* Х. Зарипов.— *Юҡ ул миндә ғәмыт — мин бары саталы тамға һала ғына беләм.* Б. Бикбай.

**САТАМАЙ** *с. диал.* Саталы. *Буран бер сатамай ҡайынды юлға ауҙарған.* М. Тажи.

**САТАН** *с.* Аяғы зәғиф булған; аҡһаҡ. *Сатан ат. Сатан кеше. // Сатан ҡалыу.* ■ *Үгеҙҙәрҙе бер ун биш йәштәр самаһы бала ҡыуа, ул сатан, ағас аяҡлы.* Д. Юлтый. *Байрамдарҙа һин бейеһен тиеп, атаң сатан ҡайтҡан һуғыштан.* Р. Бикбаев.

● *Һуҡыр күп күрер, сатан күп йөрөр.* Мәҡәл.

**САТАНЛАУ** *к.* **1.** Зәғиф йәки ауыртҡан аяҡ менән һылтыҡлау. *Сатанлап атлау.* ■ *Сатанлап, таяҡҡа таянып, иптәштәрем эргәһенә ҡайттым.* Д. Юлтый. *[Кемдер] таяҡ таянып, сатанлай-сатанлай юл ситендәге ус аяһындай ғына һаҙлыҡта туҡтаны.* В. Нафиҡов.

**2.** Сатанға, аҡһаҡҡа әйләнеү, сатан булыу. *Раушл .. аяғын һындырып, .. сатанлап ҡалғайны, армияға алманылар.* С. Агиш.

**САТАШЫУ** *к. диал.* Һаташыу.

**САТЕЛЛИТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Боронғо Римда: хужаһын оҙатып йөрөгән ҡораллы ялсы.

**2.** Формаль яҡтан ирекле, ә ғәмәлдә икенсе бер көслөрәк дәүләткә бойондороҡло булған дәүләт.

**3.** *астр.* Планетаның эйәрсене.

**САТИН** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Йылтырап торған кизе-мамыҡ туҡыма. *Биҙәкле сатин. Ҡыҙыл сатин. // Сатин күлдәк. Сатин яулыҡ.* ■ *Башына ҡыҙыл сатин кәзәкейен генә бөркәнеп, Яланбикә елтелдәп килеп инде.* Һ. Дәүләтшина.

**САТИРА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Тормоштағы көлкө, боҙоҡ хәлдәрҙе сәнғәттә әсе көлөп сағылдырыу ысулы. *Етешһеҙлектәрҙе сатира ҡулланып асыу.* /Ысынбарлыҡтағы кире күренештәрҙе фаш итеп, әсе көлөп сағылдырған сәнғәт әҫәре. *Пародиялы сатира. Политик сатира.* ■ *Башҡорт сатираһы өсөн патриархаль-феодаль ҡалдыҡтарын фашлау Октябргә тиклем дә, һуң да иң мөһим һәм актуаль темаларҙың береһе булды.* Ғ. Әбсәләмова. *Тuғыҙынсы класта уҡығанда уҡ Зиләне мәктәп комсомол ойошмаһының сатира газетаһына дегәнәк итеп төшөрөп ҡуйғайнылар.* З. Биишева.

**2.** Етешһеҙлектәрҙе фаш иткән әсе мыҫҡыл.

**САТИРИК** [*рус.*] *и.* Сатира авторы (яҙыусы, рәссам, музыкант һ. б.). *Сатирик таланты.* ■ *Бабич етдилектә үҙенең остазы Туҡай менән йәнәш торһа, сатирик һәм юморист буларак, Туҡайға ҡарағанда ла үткер, мәргәнерәк булды.* С. Ҡудаш.

**САТИРИК** *с.* **1.** Сатиранан торған, сатираға ҡоролған; сатираға мөнәсәбәтле. *Сатирик куплеттар. Сатирик плакат.* ■ *«Ул мөнафиҡ ник каса?» тигән сатирик миниатюрала 1919 йыл М. Ғафури ике йөҙлө мөнафиҡ кешеләрҙе — кисәге иҙеүселәрҙе фашланы.* Ғ. Рамазанов.

**2.** Сатираға хас; фашлаусы. *Сатирик рухта яҙылған әҫәр.*

**САТҠЫ** *и.* **1.** Янған йәки утлы нәмәнең баҙлап, сәсрәп осҡан бәләкәй генә киҫәге; осҡон. *Сатҡы сәсеү.* ■ *Ялт-йолт итә суйын сатҡылары, елле көндә осҡан ҡом кеүек.* М. Ғафури. *Мин зәһәрле ут шарының сатҡыһы.* Б. Ишемғол. / Бер-береһенә ышҡылған ике нәмәнән сәсрәп осҡан бәләкәй генә ут киҫәге; осҡон. *Сатҡы сағыу.* ■ *Икенсе сарҙа Фаяз Баев .. ҡылысын үткерләй Саҡматаштан сәселгән сатҡылар уның яралы маңлайын яҡтырта.* Ә. Ихсан. *Рәсих беҙ кергәндә мастерскойында ҡорос ҡасау менән сатҡылар сәсрәтеп таш юнып тора ине.* Р. Ғабдрахманов.

**2.** Ҡояш төшкәндә, йәшен йәшнәгәндә һ. б. ялтылдап киткән яҡты һыҙат. *Йәшен сатҡыһы. Ҡояш сатҡыһы.* ■ *Һалҡын ҡояш нурында уйнаған йәш ҡар сатҡылары .. сағыу йымылдай.* Ҡ. Ибәтуллин. *Ҡояштан сәселгән ҡыҙыл сатҡылар тау биттәрен ҡыҙыл ҡан менән йыуа.* Т. Хәйбуллин.

**3.** *күсм.* Нимәнеңдер (хистең, фекерҙең, һәләттең һ. б.) сағылышы, бәләкәй генә бер билдәһе. *Белем сатҡыһы. Бәхет сатҡыһы. Өмөт сатҡыһы. Талант сатҡыһы.* ■ *Был юлы Мәликәнең йөҙөндә шаянлыҡтың сатҡыһы ла күренмәне.* Ғ. Ибраһимов. *Недосека Сираевтың күҙҙәрендә һуңғы ваҡытта һис тә һиҙелмәгән дәрт сатҡылары һикергеләгәнен күрҙе.* Н. Мусин. / Ниндәйҙер йылы тойғо. *Яу ҡырында яңғыраған боронғо йыр уның күңеленә бер сатҡы өҫтәне.* С. Әлибаев.

**САТҠЫЛАНЫУ** *к.* **1.** Сатҡыға әйләнеү, сатҡы булыу. *Сатҡыланып осоу. Сатҡыланып яныу.*

**2.** Сатҡы биреү. *Сатҡыланып тоҡаныу.* ■ *Әфәндем, .. саҡматаш менән сепрәккә күпме һуҡма — сатҡыланмай.* Ғ. Байбурин.

**3.** *күсм.* Ниндәйҙәр хис-тойғо, фекер, һәләт һ. б. сағылыш табыу. *Тимергәле ҡарттың алдында йылы өмөт нурҙары сатҡыланып ялтыраған-дай булды.* Һ. Дәүләтшина.

**САТҠЫЛЫ** *с.* Сатҡы (1, 2 мәғ.) сәсеп, сәсрәтеп торған. *Залда йәнләнеү һиҙелде һәм үҙенә төбәлгән сатҡылы күҙҙәр асығырак күренә башланы Тимергә.* Б. Бикбай.

**САТЛАМА:** **сатлама һыуыҡ** *шул уҡ* **сатнама һыуыҡ** (*ҡар.* **сатнама**).

**САТЛЫ** *с.* Саты [1] (3 мәғ.) булған; тармаҡлы. *Ике сатлы көлтә һәнәге.* ■ *Бутка бешеп, һике өҫтөнә ҡуйылыуға әүернә башына тағылған өс сатлы тимергә сыра ҡуйып, шуның яҡтыһында ашау башлана.* М. Ғафури. *Мәскәү ҡалаһы өҫтөндә, күк ҡабағы асылғандағы кеүек нур сәсеп, биш сатлы йондоҙ ҡутәрелгән.* К. Мәргән.

**САТЛЫ-БОТЛО** *с. ҡар.* **сатай-ботай.** *Сатлы-ботло яҙыу. Сатлы-ботло ятыу.*

**САТЛЫҠ** *и.* **1.** Нимәлер айырылып киткән, ҡушылған йәки киҫешкән урын. *Трамвай сатлығы. Урам сатлығы.* ■ *Өфөнөң территорияһы*

*башлыса Ағиҙел менән Ҡариҙел йылғаларының сатлығындағы яҫы таулыкта ята.* М. Хисмәтов.— *Йәш бисәне көсөктәре менән ете юл сатлығына итеп ҡуйығыҙ* (Әкиәттән).

**2.** Ике йәки бер нисә нәмә бергә тоташып яһалған урын, мөйөш. *Мөйөш сатлығы. Өй сатлығы.* ■ *Тау сатлығына ҡыйшайып тәрәлгән фәҡир генә бер өй алдына килеп туҡтаныҡ.* М. Кәрим.

**САТЛЫҠЛАУ** *ҡ.* Бер-береһенә остарын төкәтеп, мөйөш яһау (өйҙө, мейесте һ. б.). *Мейесте сатлыҡлап сығарыу. Өйҙө сатлыҡлап һалыу.* ■ *Мөйөштәрен һырлап, сатлыҡлап сығарған мейес эргәһендә быялалы шкаф [тора].* Т. Хәйбуллин.

**САТМАШЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **сейәлеү** 1. *Еп сатмашҡан.*

**САТНАМА: сатнама һыуыҡ** ҡышҡы селләләге иң ҡаты һыуыҡ. *Польша ҡышы Башҡортостандағы кеүек сатнама һыуыҡ түгел: .. таңға табан туңдыра, иртә менән ҡубәләкләп ҡар яуа.* Д. Юлтый. *Шартлап торған сатнама һыуыҡ. Ағастарҙы бәҫ ҡаплаған.* Р. Низамов.

**САТНАТЫУ** *ҡ.* **1.** Сыйҙыртып ҡына ярыу. *Тәҙрә быялаһын сатнаттым. Сынаяҡты сатнатыу.*

**2.** Артыҡ киптереп йәки туңдырып ярыу (ерҙе һ. б.). *Ҡояш ерҙе киптереп сатнатты. Һыуыҡ балсыҡ стенаны сатнатҡан.* / Киптереп телгеләү, ярғыслау (ирende һ. б.). *Көн ысынлап та ҡоро, эҫе ел тамаҡ төбөн киптерә, ирендәрҙе сатната.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 19 сентябрь.

**3.** *күсм.* Асыҡ, оҫта, үткер итеү (һүҙҙе). *Сатнатып уҡыу. Сатнатып әйтеү. Сатнатып яуап биреү.* ■ *Сатнатып телмәр һөйләргә минең оҫталығым етмәй.* С. Кулибай. *Сәлим дә бик тиҙ бирешә торғандарҙан түгел икән, сатнатып тора, суҡынған.* И. Ғиззәтуллин.

**САТНАУ** [1] *ҡ.* **1.** Сыйылып ҡына ярылыу. *Быяла сатнай. Һөйәк сатнай. Сатнаған йомортҡа.* ■ *Ташлыйылғаның күм-күк боҙҙары көн буйына ҡыҙҙырған ҡояшҡа ҡаршы тора алмай сатнап ярылды.* М. Тажи. *Көрәшәк тулы булһа, ныҡлығын ул оҙаҡ йылдар һаҡлай. Ә буш көрәшәк иһә тора-тора уҙ алдына сатнай.* М. Кәрим.

**2.** Артыҡ кипкәндән йәки туңғандан ярылыу (ергә һ. б. ҡарата). *Ҡайһы бер урындарҙа ер ҡабығы сатнай һәм уның ярыҡтарынан магма ағып сыға.* М. Моталов. *Ситтәр ҡул аҫтында иҙелә ил, ҡояш ҡыҙыуында сатнай ер.* Х. Ҡунаҡбай. / Кибеп, телгеләнеү, ярылыу (биткә, иренгә һ. б. ҡарата). *Ғатаулланың сатнаған ирендәре ҡалтырай ине.* Й. Солтанов.

**3.** Бик ныҡ шартлау, сарт-сорт итеү, сарт-сорт килеү. *Сатнап йәшен атыла. Сатнап яна.* ■ *Ҡапыл .. сая «ур-ра!» нан тертләй, сатнай һауа.* Р. Назаров. *Ваҡыт еткәс, күмер кеүек түгел, йәшен һымаҡ сатнап һүнермен.* Ғ. Әмири.

**4.** *күсм.* Үҙәккә үтеп әсетеү, ярылып барыу; сәнсеү. *Сатнап ауыртыу. Сатнап һыҙлау.* ■ *Сания башы сатнауға түҙә алмай уянып китте.* И. Насыри. *Тамаҡтарым кипте, сатнап килә, ялыҡтым инде төрлө дарыуҙан.* В. Әхмәҙиев.

◆ **Сатнап тороу** 1) үткер, сая булыу. *[Фатима] эшкә тиһәң — эшкә, һүҙгә тиһәң — һүҙгә сатнап тора.* З. Шәрҡи; 2) бик көслө, ҡаты булыу (һыуыҡҡа ҡарата). *Сатнап торған һыуыҡ, ел ҡотора, буран ҡаплай юлсы санаһын.* М. Хәй.

**САТНАУ** [2] *ҡ. диал. ҡар.* **сарсау** [1]. *Тамағым сатнаны.*

**САТРА** *и. иҫк.* Бергә килеп ҡушылған ике юл йәки йылға араһы; сат [1] (2 мәғ.). *Әй, сатра, сатра, сатрала кәкүк саҡыра* (Сеңләүҙән).

**САТРА́П** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Боронғо Персияла һәм ҡайһы бер боронғо Көнсығыш дәүләттәрендә хәрби-административ өлкә (провинция) башлығы.

**2.** *күсм. кит.* Законды иҫәпкә алмай, үҙ иркенә хөкөм йөрөткән башбаштаҡ хаким, түрә. *Батша сатраптары буйһонмаған башҡорттарҙы һис киҫекмәҫтән «тамам тынысландырырға» кәрәк тип эш итәләр.* М. Хисмәтов.

**САТРАШ** [1] *с.* **1.** Арҡыры-буй һыҙыҡтарҙан торған; шаҡмаҡлы. *Сатраш ашъяулыҡ. Сатраш биҙәк. Сатраш тауар.* ■ *Башына ҡыҙыл яулыҡ бәйләгән, сатраш күлдәк кейгән ҡатын: — Баҙар сумкаһы юҡмы һеҙҙә? — тип өндәшә.* А. Игебаев.

**2.** Арҡыры-буй йүнәлешле. *Сатраш һыҙыҡ.* // *Сатраш һыҙыу. Сатраш һалыу. Сатраш ятыу.* ■ *Беҙ сатраш үткән ике юл сатына килеп еттек.* С. Кулибай.

**3.** *и. мәг.* Шаҡмаҡ биҙәктәрҙән торған сигеү төрө.

**САТРАШ** [2] *и.* Арҡыры-буй һыҙған шаҡмаҡлы таҡтала уйнай торған уйын; шахмат, шашка. *Сатраш таҡтаһы. Сатраш уйыны.* ■ *Толстой ғаиләһе [Мөхәмәтшә картты] үҙ иткән, уның менән бергә шаярған, ҡымыҙ эскән, аҡ кейеҙгә йәйелеп ултырып сатраш уйнаған.* К. Мәргән. *Әминбәк .. батшаға сатраш уйнарға киткән* (Әкиәттән).

**САТРАШЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Арҡыры-буй йүнәлештә ҡуйыу йәки һалыу; сатраш [1] (2 мәғ.) итеү. *Ҡыҫҡа ҡара салбары таҫма бауҙар менән сатрашландырып яурындары аша тарттырып ҡуйылған.* Ф. Иҫәнғолов.

**САТРАШЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **сатрашлау.** *Урындыҡтың икенсе башында сатрашланып биҙәлгән тағы бер һандыҡ.* Т. Хәйбуллин.

**САТРАШЛАУ** *ҡ.* **1.** Арҡыры-буй һыҙыҡлы итеү, сатраш [1] итеү. *Сатрашлап биҙәү. Сатрашлап һуғылған ашъяулыҡ. [Бабайҙың] ҡатыны йөн иләгән, сатрашлап балаҫ һуҡҡан* [Әкиәттән].

**2.** Нимәнелер арҡыс-торҡос уратыу йәки ҡуйыу. *Сатрашлап бинт бәйләү.* ■ *Ғатаулла .. баш аҫтына ике ҡулын сатрашлап һалып, һикегә салҡан ятты.* Й. Солтанов.

**САТ-СОТ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат сат [3] иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сат-сот итеү. Сат-сот һағыҙ сәйнәү.*

**САТУ́РН** [*рус.* ⟨ *лат.*] (*баш хәреф менән*) *и.* Ҡояш системаһында Ҡояштан алтынсы торған планета.

**САТЫЛДАТЫУ** *ҡ.* **1.** Сат-сот иттереү, сат-сот килтереү. *Өйрәнсек ысын яһау көрәшәктәрҙең әле береһен, әле икенсеһен алып ҡарап, баш сайҡап, тел сатылдатып торған.* З. Биишева. *Ғәйшә әбей Талипты күргәс, ҡаушап ҡалды.—*

*Бына көтмәгән ҡунаҡ! — тип, ауыҙын сатылдатып ҡуйҙы.* З. Хисмәтуллин.

**2.** *күсм.* Һүҙен, хәбәрен тотлоғоп, туҡтап тормай, теҙеп әйтеү. *Минең йәш бисә бик батыр, иренән дә ҡурҡмай, һүҙен сатылдатып һөйләй.* Һ. Дәүләтшина.

**САТЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Сат-сот итеү, сат-сот килеү.

**2.** *күсм.* Хәбәрен тотлоғоп тормай, теҙеп, шыма һөйләү. *[Мәгфирәне] бигерәк тә уның [Айбулаттың] руссаны һыуҙай эсеп, сатылдап һөйләүе гәжәпләндерә.* Һ. Дәүләтшина.

**САТЫР** [1] [*гәр.*] *и.* **1.** Һыу үткәрмәй торған беше туҡыманан йәки кейеҙҙән, тиренән ҡаҙыҡтарға тарттырып кереп, елдән, ямғырҙан ышыҡланыу, ваҡытлыса тороу өсөн эшләнгән еңел ҡоролма. *Сигандар, Үҙәште буйында туҡталып, .. киҫкә табан дүрт сатыр ҡороп, уның эргәһенә ут яҡтылар.* Ж. Кейекбаев. *Элекке йәй ураҡ урып ятҡанда, бер төн дауыллы ямғыр килде лә беҙҙең сатырыбыҙҙы ауҙара яҙҙы.* Д. Юлтый. *Аҡ сатырлы лагерҙарҙа уйнап-көлөп йәшәнек беҙ.* Н. Иҙелбай. / Күсмә халыҡты иҫәпләү берәмеге. *Ҡушҡар бей, атаһы вафат булғандан һуң, 60 сатыр кеше әйәртеп, Иҙелде арҡыры сығып, Яйыҡ һәм Һаҡмар тамағына килеп урынлашҡан.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**2.** Ямғыр, ҡояштан һаҡланып, баш осонда тотоу өсөн эшләнгән еңел көмбәҙ. *Комбайн сатыры.* ■ *Бисәләре баш өҫтөндә сатыр тотоп йөрөгән була. Йәнәһе, беҙҙең ҡояш уларға килешеп бөтмәй.* М. Кәрим.

**3.** *күсм.* Ағастың ҡояштан ышыҡ яһап торған бөтә ботаҡ һәм япрағы. *Ағастың .. олоно беҙҙән ун метр самаһы ҡырҙа, ә сатыры беҙҙең баш осона уҡ килеп еткән.* Ғ. Ғүмәр.

♦ **Сатыр сәскәләләр** *бот.* сәскәһе һабаҡ осонан нур һымаҡ төрлө яҡҡа таралып үҫкән ойошма сәскәле үҫемлектәр ғаиләһенең атамаһы.

**САТЫР** [2] *оҡш.* Йәшен йәшнәгәндә, ағас һынып ауғанда һ. б. сыҡҡан дауамлы тауышты белдергән һүҙ. *Сатыр итеп ҡалыу. Сатыр итеп һыныу.*

**САТЫРЛАНЫУ** *ҡ.* Сатыр [1] (3 мәғ.) ебәреү. *Сатырланып үҫкән ағас.*

**САТЫРЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** Сатыр-сотор иттереү, сатыр-сотор килтереү. *Сатырлатып йәшен йәшнәне. Сатырлатып ут яғып ебәреү.*

**2.** *күсм.* Һүҙен, хәбәрен тотлоғоп, туҡтап тормай, теҙеп әйтеү; шытырлатыу, сатылдатыу. *Сайма әле генә булған хәлде сатырлатып һөйләне лә бирҙе.* Н. Мусин.

**3.** *күсм.* Бик ныҡ тотоноу. *Гәрәй атаһының ҡулынан сатырлатып тотоп ҡалды.* Б. Бикбай. *Хисам ағаҫҡа сатырлатып йәбешеп өлгөргән* (Әкиәттән).

**САТЫРЛАУ** *ҡ.* **1.** Сатыр-сотор итеү, сатыр-сотор килеү. *Сатырлап яныу.* ■ *Винтовкалар шартлай, пулемёттар ҡабаланып сатырлай.* Д. Юлтый. *Ҡуҙҙе лә аҫтырмай йәшен ялтлай, ағастар сатырлап йығыла.* К. Кинйәбулатова.

**2.** *күсм.* Һүҙен, хәбәрен туҡтап, тотлоғоп тормай, сатнатып һөйләү. *[Әсә — балаһына:] Бүтән саҡта сатырлап торғаныңды, уҡытыусың алдында нишләп боҫоп ҡына ултыраһың?* Н. Мусин.

**САТЫРЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **сатырлау 1.**

**САТЫРМАН** *р. диал. ҡар.* **сат**[2]. *Сатырман йәбешеү.*

**САТЫР-СОТОР** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат сатыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сатыр-сотор килеү. Сатыр-сотор итеү.*

**САУАП** *и. ҡар.* Һауап. *Сауап алыу. Сауап булыу.*

**САУАХИЛ** *и. иҫк. кит.* Сахил.

**САУҒА** *и. иҫк.* Һунарҙан ҡайтҡанда осраған кешегә бирелә торған бүләк. *[Ҡыҙ:] Атып алған аңынан беҙгә сауға бирмәйме?* «Буҙйегет».

**САУҘА** [*фарс.*] *и.* Ике аралағы һатыу-алыу шөғөлө; алыш-биреш. *Тышҡы сауҙа. Дәүләт сауҙаһы. Сауҙа бәйләнеше. Сауҙа әйләнеше. Сауҙа эше. Сауҙа йөрөтөү.* ■ *Кейемен һатҡан һалдаттар һәм шпаналар менән сауҙа бара. Улар .. иҫке кейемдәрҙе лә аҡсаға һата.* Д. Юлтый.

□ **Сауҙа итеү** алып һатыу менән шөғөлләнеү; һатыу итеү. *Икенсе яҡта эреле-ваҡлы магазиндар, баҙар көндәрендә генә сауҙа итә торған .. ваҡ лавкалар теҙелеп киткән.* Ғ. Дәүләтшин.

**САУҘАГӘР** [*фарс.*] *и.* Хосуси сауҙа менән шөғөлләнгән кеше. *Килер бер көн, донъяның иң атаҡлы сауҙагәрҙәре мировой йәрминкәләрҙә беҙҙең нисек сауҙа иткәнгә һоҡланып ҡарап торор.* С. Агиш.

**САУҘАЛАШЫУ** *ҡ.* **1.** Икәү-ара һөйләшеп, нәмәнең хаҡын килешеү, һатыулашыу. *Аҡназар оҙаҡ сауҙалаша торғас, арышының ботон етмеш биш тиндән һатып ебәрҙе.* Ғ. Дәүләтшин. *[Котош:] Хәмди, ҡайҙа юғалдың. .. Өйҙә сауҙалашырға килгәндәр, ҡайт тиҙерәк.* Ш. Янбаев.

**2.** *күсм.* Нимәгәләр килешер-килештерер өсөн һүҙ көрәштереү. «*Асмайһығыҙмы?*» «*Юҡ!*» .. *Әхтәм өй эсендәге ҡыҙҙар менән ишек арҡыры һаман сауҙалаша.* Ғ. Хәйри.

**САУҘАХАНА** [*фарс.*] *и. иҫк.* Сауҙа йорто. *Асылған ошо сауҙаханалар һәм уның файҙаһы татарҙың мәҙәниәтен күтәреү өсөн китә.* З. Шәрҡи.

**САУҠА** *и.* Йәш ҡайын. *Ҡайын сауҡаһы.* ■ *Мин .. һәр ағаска, һәр сауҡаға күҙ текәп, инеш һаҙлығына юл алдым.* С. Кулибай. *Уйһыу ерҙә үҫкән аҡ сауҡалар тынлыҡ моңон тыңлап әйелгән.* Т. Йәнәби.

**САУҠАЛЫҠ** *и.* Йәш ҡайындан торған ағаслыҡ. *Ана, тегендә, әлеге бейек ҡаяны ике яҡлап, ҡайын, уҫаҡ сауҡалыҡтары тау башынан Һаҡмар уҙәненә тиклем барып еткән.* М. Әбсәләмов. *Үҙән буйкайҙары ай сауҡалыҡ, ҡуләгәһе беҙҙең өйөбөҙ* (Халыҡ йырынан).

**САУЫҒЫУ** (сауыҡ*ғ*) *ҡ.* Ауырыуҙан йәки башҡа сәбәптән кибегеп (2 мәғ.), һурылып ябығыу. *Ә мин һаман ябығам. Бәлки, һағыныуҙан шулай сауығамдыр.* С. Әлибаев.

**САУЫҠ** [*гәр.*]: **сауыҡ ҡылыу** (*йәки* **итеү**) *иҫк. кит.* 1) етәкселек итеү, баш булыу. *Ғәскәр менән [Мәсем хан] сәхрәлә сауыҡ ҡылған.* «Бабсаҡ менән Күсәк»; 2) *күсм.* йүнәлеш биреү, йүнәлтеү. *Мине сәҙәткә алып бара торған ысын тормош юлына сауыҡ итмәнеләр.* Ғ. Рафиҡи.

**САУЫЛ** *и.* **1.** Яңғыҙ үҫкән ҙур ҡайын ағасы. *Бай сауыл. Суҡ сауыл.* ■ *Бейек кенә сауыл башында аҡ ҡарсыға микән ҡағынған* (Халыҡ йырынан).

2. *кар.* **сауыллык** 1. *[Ғәрифә — Бикмырҙаға:] Һиңә әйтәм, утын бөттө. Сауылдан сыбык-сабык булһа ла алып кайтһаңсы?* Н. Кәрип. *Бер аҙ ел дә сыккан, сауылдар сайкалыша.* К. Кинйәбулатова. *Алагулкәй буйы сауылга кыҙ балакай сыга уйынга* (Халык йырынан).

3. *диал.* Саука.

**САУЫЛЛЫК** *и.* **1.** Эре кайын ағаслығы. *Ауыл артына сыккас та, сауыллык араһына инеп югалдык.* Н. Кәрип. *Ашап, эсеп которонган халык .. оран һалып сауыллык араһына ябырылды.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *диал.* Саукалык. *Куйы урманлыктан сыгып, вак сауыллыкка килеп ин[дек].* С. Ханов.

**САУЫЛЫУ** *к.* Бер ергә тупланыу; өйкөлөү (малға карата). *[Бай:] Малдар тарпан булып сауылып баҫһа, Акһак коланы атып үлтереп, калгандарын алып кайтыгыҙ.* «Акһак кола».

**САУЫМ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Ураҙа. *Атлас тун баҙарында киммәт үтәр, сауым илдең баҙарында һыу ҙа бикәр.* Акмулла.

**САУЫН** [1] *и. иҫк.* Кунак мәжлесе, туй. **Сауын** әйтеү туй, мәжлес булырын иғлан итеү. *Бейҙәрҙең был һүҙенә бары кунде, кушалә сауын әйтеп атка менде.* «Буҙйегет».

**САУЫН** [2] [*гәр.*] *и. иҫк.* Кемдеңдер башкаларҙы йәки нимәнелер һаклауы, яклауы. *Малы казалап бөлгән ярлылар үҙ ырыуындагы байга ялсы булып китә торган булган. Шул мөнәсәбәт сауын тип аталган.* Ә. Әсфәндияров.

**САУЫР** [*фарс.*] *и.* Кипаристар ғаиләһенә караған, япрағы артыштыкына окшаған мәңге йәшел көньяк ағасы.

**САУЫШ** *и. иҫк. кар.* **нөгәр** [1].

**САФ** [1] [*гәр.*] *с.* **1.** Үҙ составынан ғына торған, башка нәмә кушылмаған (төрлө элемент, матдәгә карата). *Саф көмөш.* ■ *Йөҙөк былай саф алтындан түгел, 56 пробалы гына.* С. Агиш. *[Тимер — Фатимага:] Аҫыл заттар? ! Саф алтындан бит! Кайҙан алдың?* Б. Бикбай. *Божра .. саф быяла төҫлө һәм шәфаф үҙе.* Ш. Бабич. / Башка төр током катышмаған, үҙ токомо сифаттарын һаклаған (үҫемлек, хайуан һ. б. карата). *Саф башкорт токомло ат. Саф бохар бесәйе. Саф бөрйән корто.* /Каны башка кан менән катнашмаған, бер состав канлы.

**2.** Тәбиғи төҫөндә булған, болғанмаған, үтә күренмәле таҙа (һыуға һ. б. карата). *Таштарҙан тере көмөштәй саф шишмә сыга агып.* Р. Ниғмәти. *Бакса артында көмөштәй сылтырып саф һыу ага.* Д. Юлтый. /Туҙаны булмаған, таҙа; бөркөү, тынсыу түгел,(һауаға карата). *Һарыга һабышкан Зөлхизә кайһы сактарҙа, саф һауала бер аҙ куңелен аскыһы килеп, кырга, тәбигәт киңлегенә сыгыр булган.* Н. Иҙелбай. *Саф һауаны ялкын ашап төшә, ут һулайһың һауа урынына.* Ш. Бабич. / Болотһоҙ, томанһыҙ (күк йөҙөнә карата); асык. *Күк йөҙө саф, унда иҫәпһеҙ йондоҙҙар һибелгән.* Д. Юлтый.

**3.** Асык яңғырашлы, якшы ишетелгән (тауышка, өнгә карата). // *Саф яңгырау.* ■ *Матур йыр, саф тауыш Акселән буйҙарын яңгыратып, әллә кайҙа алыҫтарга китә, куңелдә рәхәтлек уята.* Б. Бикбай. *Эй, касан һуң сәхнәбеҙҙә шыңгырап моң, саф ауаз?* Ш. Бабич.

**4.** Ял иткән, арымаған. *Саф баш менән.* /күсм. Бөтә күңелен биргән, ихлас (көс, дәрткә һ. б. карата). *Беҙҙең тормош һөйә намыҫ менән саф көс һалган таҙа хеҙмәтте.* Д. Юлтый.

**5.** Тейешле нормаға, кағиҙәгә тап килгән, дөрөҫ (тел, стилгә һ. б. карата). *Саф башкорт телендә һөйләү.* /Билдәле бер стилдә яҙылған, башка стилдәрҙән азат. *Саф гилми стиль. Саф халык телен кулланыу.*

**6.** Әхлак яғынан боҙолмаған, тотанаклы; бер ниндәй бысрак уйһыҙ, эскерһеҙ; хәйләһеҙ, тоғро һәм намыҫлы. *Саф йәшлек. Саф тойго. Саф выждан. Күңеле саф.* ■ *[Айбулаттың] йөрәге әллә ниндәй бер югары, таҙа, саф дуҫлык, мәңгелек ышаныс менән тулкынып тибә ине.* Һ. Дәүләтшина. *Был тиклем саф күңеллелек һәм бер катлылыкка күңеле йомшарып киткән Өйрәнсек ең остары менән күҙҙәрен һөртөп алган.* З. Биишева. / Юғары әхлаклылык менән һуғарылған, юғары максатлы. *Саф теләк.* ■ *Сәгиҙә ауыл йәштәренең йырҙарына ла, уҙҙәренә лә һәм эскерһеҙ, саф мөхәббәтенә лә гашик булгандай, көлөп ебәрҙе.* М. Тажи. / Бер ниндәй гөнаһы булмаған, ғәйепһеҙ. *Саф бала. Саф кыҙ.* ■ *Кукрәгемдең михрабында ултыра шәфкәт яндырып, нурлы шәфкәттән яралган бер мәләктәй саф катын.* Ш. Бабич.

**7.** Бер ниндәй алдыкһыҙ, ысынды сағылдырған. *Саф тормош.* / Ғәйепһеҙ, ышаныслы. *[Сәгиҙә:] Иремде тиҙерәк сыгарыгыҙ, уның бер төрлө лә гәйебе юк. Иремдең саф кеше булыуына органдар алдында башым менән яуап бирәм.* М. Тажи.

**8.** Ниндәйҙер юл менән кулға ингән, табылған. *[Бәҙрихаят:] Бына, Хәтмулла, бөгөн дә илле ете һум тукһан тин саф акса эшләнек.* Д. Исламов. *Колхоз һуңгы өс йылда йыл һайын уртаса 416 мең һум саф табыш алды.* Ғ. Ишбулатов.

**9.** Тормоштан ситкә киткән, тормош менән бәйләнмәгән. *Саф теория. Саф фәнни караш.* ■ *Котлайым Ғәзиз Ғөбәйҙуллинды идеалы менән, саф гилемгә хеҙмәт итеү — идеалы шул тип беләм.* Ш. Бабич.

◆ **Саф кан** *кар.* **кан** [1].

**САФ** [2] [*гәр.*] *и.* **1.** Бер һыҙыкка теҙелеп баҫкан йәки барған кешеләр һәм башка нәмәләрҙең билдәле тәртиптәге рәте һәм шул рәтте төҙөгән төркөм. *Ғәскәр сафы. Карантар сафы. Саф буйы. Сафка теҙелеү. Сафка тороу.* ■ *Бер төркөм эшсе һалдаттар сафы булып артка сыкты. Һалдаттар менән эшселәр бутала башланы.* Д. Юлтый. *Дошман сафын тар-мар итергә изге яуга уктай атылдым.* Салауат Юлаев.

**2.** Бер эш, максат менән берләшкән төркөм, даирә, коллектив. *Партия сафы. Алдынгылар сафына баҫыу.* ■ *Етенсе класта, ун дүрт йәштә, мин комсомол сафына индем.* З. Биишева. *[Талха] бесән сапты тугайлыкта, ярышып алгы сафта.* С. Кулибай. **Сафка баҫыу** (*йәки* **инеү**) 1) башкалар рәтенә инеп, бергә эшләй башлау; 2) эш өсөн әҙер булып, эшләй башлау, эксплуатацияға бирелеү. *[Хужалыкта] яңы кеүәттәр сафка баҫа.* **Сафтан сығыу** 1) ауырып, имгәнеп йәки башка сәбәптән эшкә ярамау, эшлектән сығыу; 2) ватылып, боҙолоп эшкә ашмаҫ хәлгә килеү.

**САФА** [*гәр.*] *и.* **1.** Рәхәтлек, хозурлыҡ; кинәнес. *Шагир синфи йәмғиәттә ғәләмдең башы аяғына төшөп михнәт сиккәнен күрә, был донъяның яфаһы күп, сафаһы юҡ, тип тә зарлана.* Ә. Харисов. *Юҡ әүәлге йәм һарайҙа, ҙур матәм, бөткән сафа.* Б. Мирзанов.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

□ **Сафа һөрөү** рәхәтлектә йәшәү. *Эшсе халыҡ йәшәһен, һөрһөн донъя сафаһын.* Ш. Бабич.

**САФАЛЫ** *с.* Рәхәтлеккә, хозурлыҡҡа тулы; кинәнесле.

□ **Сафалы итеү** рәхәт, хозур тормошҡа әйләндереү. *Әммә шағир быны [синфи йәмғиәттән ризаһыҙлығын] актив бер протест мәғәнәһендә әйтмәй, донъяны яфанан ҡотҡарып сафалы итеү өсөн тырышайыҡ, шул изге эш өсөн үҙебеҙҙе фиҙа ҡылайыҡ, тип өндәмәй.* Ә. Харисов.

**САФАҮӘТ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Күңел асыш. *Сафаүәт урыны.*

**САФЛАНДЫРЫУ** [1] *к.* **1.** Башҡа ҡушылдыҡтарҙан азат итеү, айырып алыу; саф [1] (1 мәғ.) итеү. *Бензолды сафландырыу. Көкөрттө сафландырыу.* /Нәҫелде һайлап алыу юлы менән бер төрлөгә килтереү йәки элекке саф нәҫелде кире-нән ҡайтарыу. *Холмогор тоҡомон сафландырырға кәрәк.*

**2.** Тондороп, таҙартып, саф [1] (2 мәғ.) итеү (быҫраҡ һыуҙы һ. б.). *Йылға һыуын сафландырыу.* / Туҙанын, бөркөүлеген һ. б. бөтөрөп, елләтеп, һауаны, бүлмәне саф [1] (2 мәғ.) итеү. *Бүлмә һауаһын вентиляция менән сафландырыу.* ■ *Яҙ .. һандуғасын һайраттырып, йылғаларын йырлаттырып, урмандарын шаулаттырып килгән йыл миҙгеле бар мөхитте сафландыра, күңелдәрҙе хисләндерә, тойғоларҙы яңырта ла ҙур өмөттәр уята.* Т. Сәғитов.

**3.** Ял иттереп, арыуын, ҡайғырыуын бөтөрөү (башты). *Эштән һуң йәйәү йөрөп, башты сафландырыу.*

**4.** Буталсыҡ уй, фекерҙәрҙән һ. б. арындырыу (кешене, аңды, күңелде һ. б.). *Уйланыу, уйлана белеү — кешенең кешелегән күтәрә, аҡылын сафландыра, ҡарашын үткерләтә торған шарт ул.* Ә. Вахитов. *Мөхәббәт һәм изге нәфрәт батыр итә, күңелдәрҙе сафландыра, матур итә.* Ҡ. Даян.

**САФЛАНДЫРЫУ** [2] *к.* Саф [2] итеп теҙеү, сафҡа баҫтырыу.

**САФЛАНЫУ** [1] *к.* **1.** Башҡа ҡушылдыҡтарҙан азат булыу, айырылыу; саф [1] (1 мәғ.) булыу, сафҡа әйләнеү. *Сафланған баҡыр.*

**2.** Тоноп, таҙарып, саф [1] (2 мәғ.) хәленә килеү. *Сафланған шишмә. Сафланған һыу.* / Туҙаны, бөркөүлеге бөтөү, таҙарыу. *Һауа сафланып, үләндәр йәшәреп, урман-тауҙар аҡ томанға төрөнөп, матурланып ҡалды.* М. Сәғитов. *Йәйләүҙәрҙә генә түгел, ауылдарҙа ла һауа сафланды.* И. Ғиззәтуллин.

**3.** Ял итеп, арыуы, ҡайғырыуы бөтөү, асылыу (башҡа ҡарата). *Һауала йөрөп, башым сафланып ҡалды.*

**4.** Кире хис, тойғоларҙан, буталсыҡ уйҙарҙан, ауыр тәьҫораттарҙан арыныу. *Аң сафланыу.* ■ *Әй, сихырлы .. мандолина!.. Әйҙә һыҙҙыр, сафланайым.* Ш. Бабич.

**5.** Эскерһеҙ, саф күңеллегә әйләнеү. *Һәр йотомдоң рәхәт һалҡынлығы күңел борсоуҙарын ҡыуырлыҡ, йөҙҙәреңде уның һыуы менән тик сафланыр өсөн йыуырлыҡ.* Ә. Таһирова. *Ә мин бөгөн шул ерҙәрҙә йөрөнөм, бала сағым шикелле сафланып.* С. Ҡудаш.

**САФЛАНЫУ** [2] *к.* Саф [2] булып теҙелеү, сафҡа баҫыу. *Беҙ тағы сафланып һөжүмгә атланыҡ.* С. Ҡудаш.

**САФЛЫҠ** *и.* **1.** Саф [1] (1—5 мәғ.) хәл, торош. *Алтындың сафлығын белеү. Тауыш сафлығына һоҡланыу. Тел сафлығын һаҡлау. Тоҡом сафлығына ирешеү. Тәбиғәт сафлығынан кинәнеү. Тәбиғәт сафлығын күҙәтеү.* ■ *[Хасбулат:] Көршәк .. һинең тауышыңды йырға әйләндереп, уйнап ебәрәме ни? Сафлығын әйт әле һин ул яңғырауҙың!* З. Биишева. *Тәҙрәмде мин асам, әйҙә сафлыҡ, әйҙә сафлыҡ, хуш еҫ эркелһен.* Ф. Рәхимғолова.

**2.** Тоғролоҡ, намыҫлылыҡ; эскерһеҙлек. *Әхлаҡ сафлығы.* ■ *Их, Нәфисә, Нәфисә!.. Ниңә көтмәнең?.. Ә ул, Хисмәтулла, кисә генә үҙен ниндәй бәхетле тоя ине. Һинең сафлығыңа һәм тоғро буласағыңа ышанып ҡайтты ул.* Я. Хамматов. *Алла Әнүәрҙе бөтә сафлығы һәм ҡайнарлығы менән һөйҙө.* Ғ. Әмири. *Кешенең сафлығына дәлил булыр, һәр ваҡыт хаҡлыҡ менән ҡылған эше.* М. Ғафури.

**САФСАТА** [*гәр.*] *и.* Кәрәкһеҙ, мәғәнәһеҙ оҙон хәбәр; буш һүҙ. *Рәшит .. үҙенең сафсатаһы екһендермәйме тип, Зәки Сабировичҡа ҡарай.* Ғ. Ибраһимов. *Ниндәйҙер бер йәнһеҙ вәғәз унда, ниндәйҙер бер ғәмһеҙ сафсата.* Р. Ғарипов. / Ялған хәбәр, һүҙ; уйҙырма. *Агрономдың сафсатаһы Ғафуриҙың кәйефен боҙҙо: «Был тупраҡты, туған, һуҡа ҡартайта!» — тине лә кабинаға инеп тә китте.* С. Кулибай. *«Дин-мәғишәт» эсе тулған нисә төрлө сафсата.* С. Ҡудаш. **Сафсата һатыу** мәғәнәһеҙ, буш хәбәр һөйләү. *Һинең ғәйбәт, сафсата һатып, донъяңды .. онота торған ғәҙәтең бар.* С. Кулибай. *Елкәнһеҙҙәр генә бер Аҡ йортта, юл юғалтып, һата сафсата.* Х. Ғиләжев.

**САФЬЯН** [*рус.* ⟨*фарс.*] *и.* Кәзә, һарыҡ тиреһенән бик йомшаҡ, төрлө төҫтә итеп эшләнгән йоҡа күн. *Сафьяндан тегелгән туфли.* // *Сафьян ситек.* ■ *Ул [Нурлы кейәү] соланға сыҡты ла сафьян тышлы ҙур китап алып инде.* Ә. Вахитов. *Ә үҙе [Әлибай] атаһы арҡаһында киммәтле кәзәкей, затлы такыя, сафьян итек кейеп алған.* Ғ. Ибраһимов.

**САХАРИН** [*рус.*] *и.* Һыуҙа һәм спиртта насар ирей торған бик ныҡ татлы төҫһөҙ кристаллик матдә; ялған шәкәр. *Сахарин онтағы.*

**САХАРОЗА** [*рус.*] *и. махс.* Татлы үҫемлектәрҙән (шәкәр ҡамышы, шәкәр сөгөлдөрөнән) алынған шәкәр.

**САХИБ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Эйә, хужа. *Мираҫ сахибы.* ■ *Елизавета Петровна Шуваловтарҙы граф итте, фельдмаршал чины бирҙе, ике нишан сахибы яһаны.* Ғ. Ибраһимов.— *Донъяны бер мин төҙәтмәм,— тиер [кәүемгә рәис булған кеше],— уның сахибы бар. Хоҙа тәкдирендә нимә яҙылһа, шул булыр.* С. Яҡшығолов.

**2.** Юлдаш, иптәш. *[Хикмәт сауҙағәр] Мәскәү һәм Мәкәрйәнән, кәнде әтрафында булған бай-*

*ҙарҙың векселдәрен бында алып кайтып, күп файҙа менән сахибтарына һатыр .. ине.* Р. Фәхретдинов.

**САХИЛ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҙур һыу яры. *Шул сакта тау баштарынан болот киҫәктәре тауыш-тынһыҙ ғына сахилға төшөп, тулкындарҙың һүҙҙәрен тыңлап .. ары-бире йөрөй.* Ғ. Рафиҡи. *Тарта упкынға йоторға ыржайып һилдәр менән! Һау сығырбыҙмы сахилға, йөк ауыр, күп ил менән?!* С. Ҡудаш. **Сахиле сәләмәт** имен, тыныс яр. *Берәр көндө сығырбыҙмы йөҙөп сахиле сәләмәткә.* М. Ғафури.

**САХИР** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Сихырсы. *Йәһәрә ул, минең йырҙар сахир тип, бүтән юлды, бүтән йырҙы баҫыр тип* (Халыҡ йырынан).

**САХИРАНӘ** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Сихырлы, сихырлағыс. *Сахиранә күҙ.* ■ *Күп замандар үтте әммә күрмәнек кыҙҙар йөҙөн, күрмәнек ул сахиранә нурлы йондоҙҙар йөҙөн.* Ш. Бабич.

**САХИХ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Ысын, дөрөҫ. *Әткәм, үҙең наҙанға һин ғилем кәҙерен белмәнең. Теле фәсих, һүҙе сахих — әнкәм бирә белмәнең* (Бәйеттән).

**САХРА** [*гәр.*] *и. кар.* **сәхрә.** *Бына әле генә сахраларҙа йәш колондай сабып үйнаным.* Ш. Бабич. *Былар күмәкләп бер матур күл буйына, сахраға сыға* (Әкиәттән).

**САХТӘ** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Ялған, алдыҡ. *Сахтә кағыҙ. Сахтә һумлык.*

**САЯ** *с.* **1.** Сәсрәп, янып торған; үткер. *Сая телле катын. Сая караш. Теле бик сая. Сая булыу. // Сая һөйләшеү.* ■ *Заһиҙә бик сая, баҫкан ерендә ут сығарып йөрөй торған кыҙ.* Н. Мусин. *[Йәмғәле:] Зөлхизәнең әсәһе, Зөлкиҙә мәрхүмә, урыны йәннәттә булһын, уттыһыуҙы үтеп сыккан сая бер бисә ине.* С. Агиш. *Атка менгәс, башкорт кыҙының да йөрәге елкенде. Кисен ул аласык янына кайтып таған атынды, усак яктыһында ҡурай көйөнә бейене. Шуға ла ул ярһыу хислегә әйләнде, сая булып үҫте.* И. Ғиззәтуллин. *[Нәғимә — Юлдашка:] Ә һин егет икәнһең, ебеп торма, бөркөт кеүек сая бул. Кыҙҙар шундайҙарҙы ярата ул.* Ш. Биҡкол.

**2.** Ажарлы, көслө. *Сая каршылык. // Сая һуғышыу.* ■ *Волга-Каспий сәхрәләре өстөнән күсеп йөрөгән сая елдәр генә «зимагор» Һиҙиәттең дошмандарға каршы ялтыраған кылысы тураһында иҫтәлектәр һөйләйҙәр.* А. Карнай. *Йыр ағыла сая зәңгәр тулкындай.* Р. Назаров. *Урамдарҙа сая алыш башланды. Ойоксан, кайһы берҙәре күлдәк-ыштандан йүгереп сыккан актар ситән артынан, тәҙрәләрҙән, өй баштарынан ут асты.* Я. Хамматов.

**3.** Үҙәк өҙгәс, әсе (тауышҡа карата). *Карағай башындағы бөркөт сая тауыш менән саңкылдап ебәрҙе.* М. Тажи. *Ғәҙәттә үҙен тота белгән Нурдәүләттең .. ягымлы күкрәк тауышы сая яңғырай ине.* М. Хәйҙәров.

**САЯЛАНЫУ** *к.* **1.** Сәсрәп торған үткергә әйләнеү, ҡыйыуланыу; сая (1 мәғ.) булыу. *Айһай, саяланған кыҙы, егетең ары торһон.* ■ *Артабан мин был эштә бер аҙ саялана төштөм — ватылған стакандарҙың ярсыктарын йәшерергә, йылдамырак йөрөргә. бик ук талапсан булмаған кешеләрҙе көттөрөргә өйрәндем.* Ғ. Ғүмәр. *Нисә әйтһәң дә, уның алдында .. саяланып бөткән сос һәм таһыллы ауыл малайҙары баҫып тора ине.* К. Мәргән. / Аяуһыҙ уҫалға әйләнеү. *Айыу саяланып кыскырып, Ғәйзуллаға ташланды, ул ялтанып калды.* Т. Сәғитов. *Дошман саяланып каршылык күрһәтә.* М. Гәрәев.

**2.** Ҡыйыуға, саяға (2 мәғ.) әйләнеү. *Был сибәр кыҙ ат өҫтөндә оҫта йөрөй, йылдан-йыл саялана бара.* И. Ғиззәтуллин. *Ямал тағы кыйыулана, саялана килеп, теҙеп алып китте.* М. Тажи. /Ниндәйҙер тәьҫирҙән көс алыу; ҡыйыуланыу, ғәйрәтләнеү. *Кешелә шундай вакыттар була: каршыһында үлем торғанда ла батырлана, үлем менән көрәшеү дәрәжәһенә етә, саялана.* Ғ. Хәйри. *Әтәстәрҙең саяланып кыскырыуы .. яҙҙың тулы хокук алып килеүе тураһында һөйләй.* Ғ. Зөлкәрнәйев.

**САЯЛАШЫУ** *к. диал.* Уҫаллашыу.

**САЯЛЫҠ** *и.* Сая (1, 2 мәғ.) булыу сифаты. *Өсөнсө тапкыр колак яргыс саялык менән һөрәнләп ебәргән. Ел-Дауыл: — Уян! Шатлан, шаш, Диңгеҙйән!* З. Биишева. *[Тәнзиләнең] тауышында ниндәйҙер моң, һағыш, шул ук вакытта тәүәккәллек, саялык та яңғырай ине.* Н. Ҡотдосов.

**САЯН** *и.* **1.** Үрмәксегә оҡшаған ағыулы көньяҡ бөжәге. *Һары һандык эсе мыжғып торған йылан да саян, ти* (Әкиәттән).

**2.** *с. мәғ. күсм.* Яуыз, зәһәр; уҫал (кешегә ҡарата). *Саян кеше.*

**3.** *(баш хәреф менән) астр.* Йондоҙлоҡ исеме.

**САЯНЛАНЫУ** *к.* Яуызға, уҫалға әйләнеү, йыртҡысланыу. *Фельдфебель Шульц Аняның майор катыны икәнен белгәс, бөтөнләй саянланып киткән.* Ә. Харисов.

**СБОР** [*рус.*] *и.* **1.** Пионерҙар йыйылышы. *Дружина сборы. Отряд сборы.*

**2.** Хәрби эҙерлек өсөн ваҡытлыса саҡырылыш. *Сборға барыу. Сборға йыйыу.* **Сбор уйнау** йыйылырға сигнал биреү.

**СБРУЙ** [*рус.* сбруя] *и.* Арбаға, санаға ат һ. б. егеү өсөн ҡулланылған бөтә кәрәк-яраҡ; ҡамыт-дуға. *Ат сбруйы. Сбруй йүнәтеү.* ■ *Һәр кем сбруйын үҙе барланы, атты үҙе екте.* С. Агиш. *Миңә балсык ташый торған бер арба, бөтә сбруйҙары менән бер ат биреп, бөтә мәсьүлиәтте үҙемә тапшырҙылар.* М. Ғафури.

**СВАЙ** [*рус.* свая] *и.* Төрлө ҡоролма аҫтына терәк итеп ҡағылған бетон йәки ағас бағана. *Күпер свайы.* ■ *Күпергә .. имән бүрәнәнән свай кағалар.* Ф. Иҫәнғолов. *Хәҙер йорттарҙы свайҙар өҫтөнә ултыртыу буйынса бөтә союз күләмендә эш алып барыла.* И. Ғиззәтуллин.

**СВАРКА** [*рус.*] *и.* Бер береһенә тейҙерелгән ике тимерҙе һ. б. иретеп, машина деталдәрен, конструкцияларҙы һәм ҡоролмаларҙы бергә тоташтырыу процесы. *Газ сваркаһы. Контактлы сварка. Сварка агрегаты. Һалкын сварка. Сварка яһау.* ■ *Бер мөйөштә, тимер ширма эсендә, сварка бара. Уның күҙҙе сағылдырыр зәңгәр нурҙары .. стена, түшәмде яктыртып ала.* З. Ғәлимов.

**СВАРКАЛАУ** *к.* Сварка яһау. *Торбаларҙы сваркалау. Рельстарҙы сваркалау.* ■ *Бында [мастерскойҙа] һыу, пар һәм газ үткәреү торбаларын ацителен менән сваркалайҙар.* Ә. Байрамов.

**СВА́РЩИК** [*рус.*] *и.* Сварка яһау менән шөғөлләнгән кеше. *Сварщиктар мәктәбе. Сварщик булып эшләү.*

**СВА́СТИКА** [*рус.* ⟨*санскр.*] *и.* Баш-баштары тура мөйөшләп бөгөлгән тәре рәүешендәге билдә (йыртҡыслыҡ, вәхшилек, йәбер символына әйләнгән фашизм эмблемаһы). *Фашист свастикаһы.* ■ *Таң атыу менән йәшеренгән урындарынан башняларына свастика төшөрөлгән танкылар сыкты.* Ә. Ихсан.

**СВЕРХСРО́ЧНИК** [*рус.*] *и.* Мәжбүри сроктан тыш хеҙмәттә ҡалған ғәскәри кеше. *Сверхсрочник булып ҡалыу.*

**СВЕТОФО́Р** [*рус.*] *и.* Урамда, юлда хәрәкәт тәртибе һаҡлау өсөн ҡуйылған төрлө төҫтәге быялалы сигнал фонары. *Өс төҫлө светофор. Светофорҙың ҡыҙыл уты. Светофор фонары. Тимер юл светофоры.* / Һәр төрлө машинала, ҡоролмала яҡтылыҡ сигналы приборы. *Домна мейесе светофоры. Локомотив светофоры.*

**СВЕЧА́** [*рус.*] *и. тех.* Осҡон биреп, двигателде тоҡандыра торған ҡулайламаның атамаһы. *Тоҡандырғыс свеча.*

**СВИ́НКА** [*рус.*] *и.* Ҡолаҡ биҙен шештерә торған йоғошло балалар ауырыуы; паротит. *Свинка йоҡтороу. Свинка менән ауырыу.*

**СВИ́ТА** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Дәрәжәһе ҙур кешеңе оҙатып йөрөгән кешеләр төркөмө. *Свита эйәртеп йөрөү.*

**2.** *геол.* Бер заманда һәм бер шартта яралған тау тоҡомдары. *Күмер свитаһы. Эзбизташ свитаһы.* ■ *Әшә свитаһы комташтарҙан һәм балсыҡтарҙан торған Көнбайыш Уралдағы боронғо ҡатламды тәшкил итә.* Ҡ. Тимерғәзин.

**СВИ́ТЕР** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Бейек яғалы, иҙеүһеҙ итеп бәйләнгән йылы кейем. *Йөн свитер. Биҙәкле свитер.* ■ *Өҫтөнә аҡ свитер кейгән .. бер ҡыҙыҡай: «Мин бар! Исемлектә мин бар!» — тип ҡысҡырып сәбәкәй итте.* И. Абдуллин.

**СВО́ДКА** [*рус.*] *и.* Бер өлкәгә ҡараған төрлө мәғлүмәттәрҙе йыйып, берләштереп төҙөлгән документ. *Оператив сводка. Сәсеү барышы тураһындағы сводка. Һауа торошо тураһындағы сводка. Һуғыш барышы тураһындағы сводка.* ■ *Шаймаратов .. штабта 8-се кавалерия корпусының .. һуғыштарҙа алған трофейҙарының сводкаһы менән танышып ултыра ине.* Ә. Ихсан. *[Мәһәҙиев:] Бына бит һинең уҙған биш көнлөктәге сводкаңда утыҙ гектар ғына ҡал[ған тип] күрһәтелә.* Б. Бикбай.

**СВЯЗИ́СТ** [*рус.*] *и. ҡар.* **элемтәсе.**

**СВЯЗНО́Й** [*рус.*] *и.* Ғәскәри берәмектәр араһында бәйләнеш тәьмин иткән йомошсо. *Штаб связнойы.* ■ *Хәләф Йәнбиков .. таҙа егет, армияла связной булған, мотоциклда йөрөгән.* Б. Бикбай. *Бөгөн капитан Бикеев үҙенең связнойы менән йәйәүле һуғышсыларҙың йылға аша сығыуын күҙәтә.* Ш. Бикҡол.

**СВЯЩЕ́ННИК** [*рус.*] *и.* Православие сиркәүендә епископ һәм дьякон араһындағы рухани дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше.

**СЕА́НС** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Нимәнеңдер билдәле бер ваҡыт араһында туҡтамай күрһәтелеүе. *Кино сеансы. Киске сеанс.*

**2.** Нимәнеңдер билдәле бер ваҡыт араһында башҡарылыуы һәм шулай уҡ ниндәйҙер эш башҡарылған билдәле бер ваҡыт араһы. *Гипноз сеансы. Массаж сеансы. Элемтә сеансы. Көнөнә бер сеанс дауаланыу.*

**СЕБЕ** *ҡыу.* Этте ҡыуа торған һүҙ. *„Себе, себе, Ҡарағолаҡ!» — [тип әбей] этенә ҡысҡырҙы.* М. Тажи.

**СЕБЕ́Й** *и. ҡар.* **себеш**[1] 1. *Тауыҡ себейе.*

**СЕБЕН** *и.* **1.** Ике киренкә ҡанатлы, йомро яланғас ҡорһаҡлы, ҡайһы бер йоғошло ауырыуҙарҙы таратыусы бөжәк. *Правление бүлмәһендә тынлыҡ урынлашты, тик тәҙрә рамының өҫкө мөйөшөнә ҡоролған үрмәксе ауына эләккән себен генә әсе тауыш менән бүлеп-бүлеп зыңғылдай.* Б. Бикбай. *Салауат батыр ир ине, меңгән аты кир ине, яурынына уҡ тейһә, себен тешләй, тир ине* (Ҡобайырҙан). **Ҡара себен** *ҡар.* **өй себене. Ләпәкәй себен** *ҡар.* **ләпәкәй. Өй себене** өйҙә, аш-һыу тирәһендә була торған ҡара себен. **Рәшә себен.** *ҡар.* **рәшә**[1]. **Һуҡыр себен** *шул уҡ* **ләпәкәй себен** (*ҡар.* **ләпәкәй**).

**2.** *күсм.* Сүрәкә уйнағанда ҡаҙыҡ башына элә торған бәләкәй генә ырғаҡлы ағас.

◆ **Баштан себен осороу** *ҡар.* **осороу. Себендәй йән** *ҡар.* **йән. Себен күҙеү ҡырылыу** *ҡар.* **ҡырылыу** 3. **Себен күҙеү һырыу** *ҡар.* **һырыу**[2] 2. **Себен тәймәҫ сер итер** *ҡар.* **сер**[2].

**СЕБЕНЛӘҮ** *к.* Себен талағанға түҙемһеҙләнеү (малға ҡарата). *Ала ат түҙмәне, себенләп, урынынан ҡуҙғалды.* Һ. Дәүләтшина. *Йәйҙең бер эҫе көнөндә һыйырҙар себенләп, күҙҙәре аҡайышып сабыша, безләй башланы — йыйып алырлыҡ түгел.* З. Ураҡсин.

**СЕБЕН-СЕРӘКӘЙ** *и. йыйн.* Тешләй, талай торған һәр төрлө ваҡ бөжәк. *Яңағына себен-серәкәй балалап, ир-егеттең башы ҡайҙа ятып ҡалмаған.* Салауат Юлаев.

**СЕБЕРҘЕЙ** *и. диал.* Селбәрә.

**СЕБЕРЕҮ** *и.* Теҙелешеп осҡан ҡоштар сафы. *Ҡыр ҡаҙҙары себереү булып осоп бара.*

**СЕБЕШ**[1] *и.* **1.** Тауыҡтың йәки тауыҡтар төркөмөнән булған башҡа берәй ҡоштоң балаһы. *Тауыҡ себеше. Себеш сығарыу.* ■ *[Әсә — балаға:] Себеш .. сукышы менән йомортҡаның ҡабығын тук-тук итеп сукып тишә лә ҡанатын елпеп килә лә сыға.* К. Мәргән. *Көндөҙҙәрен келәт алдында ем эҙләйҙәр ала себештәр.* Ғ. Хәйри.

**2.** *диал. ҡар.* **бәпкә**[1] 1. *Ҡаҙ себештәре. Өйрәк себештәре.*

● *Себеште көҙ һанайҙар.* Мәҡәл.

**СЕБЕШ**[2]. *и. диал. ҡар.* **себешке**[2].

**СЕБЕШКЕ**[1] *и.* **1.** Ҡайындың ороланып, сырмалып торған беше тамыр төбө.

**2.** Шул тамыр төбөнән яһалған һауыт. *Ул [ҡатын] ҙур бер себешке ашлау менән һурпа килтереп ултыртты.* Ж. Кейекбаев.

**СЕБЕШКЕ**[2] *и.* Боҙолоп, тотош ҡанап торған ваҡ-ваҡ йәрәхәт (күберәк яҙлы-көҙлө һыуыҡ һыу, бысраҡ кисеп, ялан аяҡ йөрөгән балалар-

ҙа була). *Себешке сығып бөткән тәпәйҙәргә келәм булды бәпкә үләне.* М. Басыров.

**СЕБЕШКЕЛӘҮ** [1] *к.* Сырмалып, беше булып, оролануы (ҡайынға ҡарата). *[Якуп] себешкеләп үҫкән ҡайын төбөнән яһалған тустаҡтарға һалып, табында ултырыусыларға таратып бирҙе.* Т. Хәйбуллин.

**СЕБЕШКЕЛӘҮ** [2] *к.* Боҙолоп, ҡанап торған ваҡ-ваҡ йәрәхәт менән ҡапланыу. *Аяғы себешкеләгән.*

**СЕБЕШЛӘҮ** [1] *к.* Себеш [1] сығарыу. *Тауыҡ себешләгән.*

**СЕБЕШЛӘҮ** [2] *к. ҡар.* **себешкеләү** [2]. *[Рахмай], тубығын сәнсеп ултырған килеш, себешләп бөткән аяғын өрөп куя.* К. Кинйәбулатова.

**СЕБӘ** *ҡыу.* Этте ҡыуа торған һүҙ; себе.

**СЕБӘЛЕҮ** *к. диал.* Сейәлеү.

**СЕВРЮ́ГА** [*рус.*] *и. ҡар.* **уҡбаш.** *Каспий севрюгаһы. Ҡара диңгеҙ севрюгаһы. Севрюга менән бикре гибриды.*

**СЕГМЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Түңәрәктең дуға һәм хорда менән сикләнгән өлөшө һәм шарҙың ясылыҡ менән киҫелгән өлөшө. *Шар сегменты.* / *тех.* Шул рәүештәге ҡайһы бер деталь атамаһы.

**2.** *зоол.* Ҡайһы бер йән эйәләренең организмын тәшкил иткән буй-буй урынлашҡан тән быуынтыҡтарының береһе. *Селәүсен сегменты.*

**3.** *анат.* Ҡайһы бер ағзаларҙы, тән өлөштәрен һ. б. тәшкил иткән бер нисә оҡшаш өлөштәрҙең береһе.

**СЕГМЕНТАР** [*рус.* сегментарный] *с.* Сегменттарҙан (2, 3 мәғ.) торған. *Сегментар ағзалар. Сегментар төҙөлөш.*

**СЕГМЕНТАЦИО́Н** [*рус.* сегментационный] *с. биол.* Сегментацияға мөнәсәбәтле. *Сегментацион бүленеш.*

**СЕГМЕНТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. биол.* **1.** Ҡайһы бер хайуандарҙың йәки уларҙың ағзаһының сегменттарға (2 мәғ.] бүленеше. *Хайуандар сегментацияһы.*

**2.** Яралғы үҫкәндә йомортҡаның күҙәнәктәргә бүленеүе. *Йомортҡа сегментацияһы.*

**СЕГӘН** *и. диал.* Сиған.

**СЕҘӘР** *и.* Аттың алғы ике аяғын артҡы бер аяғына ҡушып бәйләгән тышау. *Сеҙәр һалыу.*

**СЕҘӘРЛЕ** *с.* Сеҙәр һалыулы.— *Ярар, ярар,— тине ҡаҙаҡ егете. Үҙе шунда уҡ алпан-толпан баҫып, сеҙәрле атына табан ашығып атлап китте.* И. Көҫәпҡол.

**СЕҘӘРЛӘНЕҮ** *к. төш. ҡар.* **сеҙәрләү.**

**СЕҘӘРЛӘҮ** *к.* Сеҙәр һалыу. *Көтөүҙең ситендәрәк көрөгән ергә ҡаҙаған, эйәрле атын сеҙәрләп ебәргән көтөүсе ҡаҙаҡ егете үләң эйтеп ултыра ине.* И. Көҫәпҡол.

**СЕҘӘРЛӘШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **сеҙәрләү.** *Ат сеҙәрләшеү.*

**СЕЗО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** *ҡар.* **миҙгел** 2. *Йәйге сезон. Ҡышҡы сезон.* ■ *Йылдың һәр сезонына ҡарап хайуандар, йәнлектәр төҫ алыштыра.* Д. Юлтый. / Ниндәйҙер тәбиғәт күренеше, емеш-еләк өлгөрөү йәки йыйыу һ. б. хас булған осор. *Алма сезоны. Емеш-еләк сезоны. Урып-йыйыу сезоны. Ямғырҙар сезоны.* **Сезон ҡаҡы** миҙгелгә ҡарап, ҡайһы бер ауыл хужалығы продукттарына үҙгәреп торған хаҡ.

**2.** Билдәле бер эш, шөғөл башҡарылған ваҡыт. *Хоккей сезоны. Һунар сезоны.* ■ *[Асыҡ бассейндарҙа сыныҡтырыу] сезоны һыуҙың температураһы 18—20 градусҡа күтәрелгәс кенә башлана.* В. Ғүмәров. *Артист өсөн яҙҙар, көҙҙәр айырыуса ҡәҙерле ул — яҙын театраль сезон ябыла һәм йәйге гастролдәр башлана, ә көҙөн яңы сезон, яңы спектаклдәр, яңы образдар ...* И. Абдуллин.

**СЕЗОНЛАП** *р.* Билдәле бер ваҡытҡа бәйләп. *Сезонлап эшләү.*

**СЕЗОНЛЫ** *с.* **1.** Билдәле сезонға (1 мәғ.) тап килгән, сезонда ғәмәлдә булған. *Сезонлы кейем. Сезонлы тауар.* ■ *Поллиноз — үҫемлек һеркәләренең [организмға эләгеүе] арҡаһында барлыҡҡа килгән сезонлы аллергик ауырыу ул.* «Совет Башҡортостаны», 1986 25 май.

**2.** Билдәле бер сезон (2 мәғ.) менән бәйле. *Баҫыу эше — сезонлы эш: ваҡытында йыйып алдыңмы — оттоң, һуңға ҡалдыңмы — отолдоң.* Н. Ҡәрип. *Нурғәле ағай .. тау эшсеһе исемен йөрөткән кеше лә түгел ине әле. Ул бында бары ярым сезонлы эшсе булып һанала.* С. Кулибай.

**СЕЗОНСЫ** *и.* Сезонлы эштә йөрөгән кеше. *Ун алты йәшендәге Ғариф .. сезонсыларға эйәреп, аҡса эшләр өсөн Донбасҡа китте.* Д. Исламов.

**СЕЙ** [1] *с.* **1.** Утта бешерелмәгән йәки һыуҙа ҡайнатылмаған. *Сей ит. Сей ҡаймаҡ. Сей ҡамыр. Сей ҡатыҡ.* ■ *Бер егет [йырсыға]: «Сей йомортҡа эсеп килергә кәрәк ине»,— тип ҡысҡырып көлдө.* М. Тажи. *[Зимфира — Азаматҡа:] Күгәргән ереңә сей картуф ябайыҡмы?* Ә. Бикчәнтәев. / Бешеп етмәгән, тейешле дәрәжәлә бешереп еткерелмәгән. *Сей икмәк. Сей ит.* / Өлгөрөп етмәгән, бешеп өлгөрмәгән. *Сей алма. Сей еләк. Сей ҡарағат.*

**2.** Һыуы кипмәгән, еүеш; ҡоро түгел. *Сей ағас. Сей бесән. Сей бойҙай. Сей ҡорот.* ■ *Ағастар йыуан, сей ине. Машинаға тейәгәндә байтаҡ ҡына хитланы.* Р. Низамов. *Түрбаш яҡта килене Бибеш боҫрап, бышылдап ятҡан сей уҫаҡ яркаларын тоҡандыра алмай .. өрөп маташа.* З. Биишева.

**3.** Тейешенсә эшкәртеп еткерелмәгән, эшкә индерелмәгән (материалға ҡарата). *Сей тире. Сей йүкә.* / *күсм.* Еренә еткереп эшләнмәгән (әҙәби әҫәргә, телгә ҡарата). *Йыйынтыҡта күбеһенсә йөкмәткеһе яғынан шыйыҡ, эшләнеше яғынан сейерәк лирик характерҙағы шиғырҙар урын [алған].* С. Кулибай.

**4.** Өйкәлеп, ышҡылып ситәйгән, ҡып-ҡыҙыл (тәнгә ҡарата).

**5.** *р. мәғ. күсм.* Тулыһы менән, тулыһынса, тотош; шыр, шау. *Сей ахмаҡ. Сей ялған.* ■ *[Рая:] Был йыуаны сей наҙан, ахыры. Ҡыҙҙар менән һөйләшә лә белмәй.* И. Абдуллин. *Селтәрҙәрем минең сей мәрйен* (Сеңләүҙән).

◆ **Сей ауыҙ** *ҡар.* **ауыҙ. Сей бала** *ҡар.* **бала** [1].

● *Ирҙе иртә ҡартайтҡан — насар ҡатын, ҡатынды иртә ҡартайтҡан — сей утын.* Әйтем.

**СЕЙ** [2] *и.* **1.** Эшләре эшләнмәй, теймәй ҡалдырылған урын. *Сей ҡалдырып тырматыу. Сей*

*калдырып урыу.* ■ *Аттарҙың төрлөсә тартыуы арҡаһында һабан бураҙнанан сығып китә лә сей кала.* М. Ғафури. *[Бригадир] ерҙә сей күрһә, борсола ана шуға.* Н. Иҙелбай.

**2.** *күсм.* Эштәге, тормоштағы етешһеҙ, кәмселекле ер. *Тикшереүселәр Нурый бригадаһында бәйләнерлек сей таба алманы.* Б. Бикбай.

**СЕЙЕНКӘ** [*рус.*] *и. һөйл.* Бик ваҡ итеп тарттырылған, яҡшы иләнгән аҡ он. *Арыш сейенкәһе. Бойҙай сейенкәһе.* ■ *[Сәлимә] сейенкә ононан кабартып бешергән икмәген һындырғылап [ашъяулыкка] һалды.* Я. Хамматов.

**СЕЙЛЕ-БЕШЛЕ** *с.* **1.** Өлгөрмәгән (тейешенсә бешеп етмәгән, бешер-бешмәҫ һ. б.). *Сейле-бешле еләк. Сейле-бешле икмәк. Сейле-бешле ит. // Сейле-бешле әҙерләү.* ■ *Яңы арыш өлгөргәненән дүрт күҙ менән көтөп алып, сейле-бешле көйгә тирмәнгә килтер[ҙеләр].* И. Насыри. *Сейле-бешле ашты әпен-төпөн генә ашаған да былар йоҡларға яткан* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Тейешле кимәлгә еткереп эшләнмәгән; булыр-булмаҫ. *Сейле-бешле әҫәр. // Сейле-бешле яҙылыу.* ■ *[Сыккан китаптар ҙа] әҙәби яҡтан еткелекле эшләнмәгән, сейле-бешле, ашығыс баҫылған нәмәләр булып сыкты.* Ғ. Дәүләтшин. *Театр репертуарына әле һаман тейешенсә эшләнеп етмәгән сейле-бешле пьесалар үтеп инә.* Н. Нәжми.

**СЕЙЛӘЙ** *р.* Бешмәгән көйө, сей көйө. *Сейләй ашау.*

**СЕЙЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Тиреһен өйкәтеп һыҙыртып, сейгә әйләндереү. *Әпнасир малайы [бурылға] һаламы сығып торган мөйәтле камыт кейҙергән. Ул уның муйынын сейләндереп бөтөргән.* С. Агиш.

**СЕЙЛӘНЕҮ** *к.* Тиреһе өйкәлеп, һыҙырылып, сейгә әйләнеү. *Сейләнгән кул.* ■ *Аяктың кабарсыған, сейләнгән ерҙәре башта ауырткан кеүек булһа ла, бара-бара кыҙып, ауырт[май] башланы.* М. Ғафури.

◆ **Елкә сейләнеү** ауыр эш менән ныҡ йонсоу. *Бында башка: елкәң сейләнһә лә, һыу ташылған булһын етерлек.* Ғ. Байбурин.

**СЕЙМ** [*рус.* ⟨*пол.*] *и.* **1.** Польша Халыҡ Республикаһында бер палаталы юғары хөкүмәт ойошмаһы.

**2.** Россия империяһына автономия хоҡуғында ингән Бөйөк Финляндия кенәзлеге (1809—1917 й. й.) парламентының русса атамаһы. *Финляндия сеймы.*

**3.** Феодализм эпохаһында ҡайһы бер илдәрҙәге ҡатламлы-вәкәләтле ойошмалар атамаһы.

**СЕЙМӘК** *с.* Аралашып, сырмалған (еп, бауға ҡарата).

**СЕЙМӘЛДЕРЕҮ** *к. кар.* **сеймәлтеү.** *Епте сеймәлдереү.*

**СЕЙМӘЛЕҮ** *к.* **1.** Аралашып, сырмалыу (еп, бауға ҡарата). *Аркан сеймәлгән. Сеймәлгән еп.*

**2.** *күсм.* Буталыу, сыбалыу (уй, фекергә ҡарата). *Уйҙар... Уйҙар... Сырмак комалактай, сырмап алган, фекере сеймәлә.* А. Игебаев.

**СЕЙМӘЛСЕК** *с.* **1.** Сырмалып, сеймәлеп барыусан. *Нәҙек кенә сеймәлсек еп.*

**2.** *күсм.* Буталсыҡ, сыуалсыҡ. *Чуманов .. куптө белгән кешеләй, үҙенсә һабаҡ бирҙе, фәһем ал тигәндәй, баштан кискәндәрен һөйләп бирҙе, ә Пичужкин иһә, быны файҙаланып, сеймәлсек еп остарын кулга ныгырак кармап алырға тырышты.* А. Мағазов.

**СЕЙМӘЛТЕҮ** *к.* **1.** Аралаштырып, бутап сырмалтыу (арҡан, епте). *Епте сеймәлтеү.*

**2.** *күсм.* Буталтыу, сыуалтыу (уй, фекерҙе). *Фекерҙе сеймәлтеү. Уйҙы сеймәлтеү.*

**СЕЙНӘҮ** *к. диал.* Сигәләү.

**СЕЙСМИК** *с.* Ер тетрәүгә мөнәсәбәтле; ер тетрәгәндәге тирбәлеш менән бәйләнгән. *Сейсмик күренеш. Сейсмик сигнал. Сейсмик тирбәлеш. Сейсмик тулкын. Сейсмик күҙәтеү.* / Ер тетрәү була торған. *Сейсмик өлкә.* / Ер тирбәлештәрен теркәй һәм өйрәнә торған. *Сейсмик карта. Сейсмик прибор. Сейсмик станция. Сейсмик хеҙмәт. Сейсмик шкала.* **Сейсмик разведка** ер ҡабығына яһалма рәүештә тирбәлдереү тулҡындарын таратып яһалған, күҙәтеүҙәр ярҙамында үткәрелгән файҙалы ҡаҙылдыҡтар разведкаһы. *Сейсмик разведка нефть һәм газға перпективаһы асыкланган райондарҙа .. алып барыла.* Д. Бураҡаев.

**СЕЙСМОГРА́ММА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Сейсмик тирбәлештәрҙе сейсмограф ярҙамында яҙыу һөҙөмтәһе. *Сейсмограмма алыу.*

**СЕЙСМО́ГРАФ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ер тетрәгәндә йәки шартлатканда ер ҡабығындағы тирбәлеште яҙа торған прибор. *Ер өҫтөнә кире сыккан был сейсмик тулкындар махсус приборҙар — сейсмографтар тарафынан яҙып барыла.* Д. Бураҡаев.

**СЕЙСМОГРАФИК** *с.* Сейсмограф ярҙамында эшләгән. *Сейсмографик күҙәтеү.*

**СЕЙСМО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Сейсмология буйынса белгес.

**СЕЙСМОЛОГИК** *с.* Сейсмологияға мөнәсәбәтле. *Сейсмологик мәғлүмәт. Сейесмологик станция.*

**СЕЙСМОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Геофизиканың ер тетрәүен һәм шуға бәйле күренештәрҙе өйрәнә торған бүлеге.

**СЕЙСМО́МЕТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тупраҡтың, короолма өлөштәренең һ. б. ер ҡабығы тетрәгәндәге көсөшен үлсәй торған прибор.

**СЕЙСМОМЕ́ТРИЯ** [*рус.*] *и.* Сейсмологияның ер ҡабығы тирбәлешен теркәү ысулдарын эҙләй торған бүлеге. *Сейсмометрия геологик структураларҙы һәм ер байлыктарын .. тау токомдарының һығылмалык үҙенсәлеген һәм уларҙың һығылмалы тулкындар үткәрә алыусанлығын файҙаланып эҙләй.* Ҡ. Тимерғазин.

**СЕЙФ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Аҡса, эш ҡағыҙҙары, төрлө ҡиммәтле нәмә һаҡлай торған утҡа янмаҫ тимер шкаф йәки ҡумта. *Сейфка һалыу. Сейфты бикләү.* ■ *Аскысы табылмаган сейфты һакларға өс кеше калды.* Я. Хамматов. *Билеттарҙы .. местком председателенең тимер сейфына бикләп куйҙылар.* Ғ. Байбурин.

**СЕЙӘ** *и.* **1.** Роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған ваҡ ҡына оҙонса шыма япраҡлы, ҡара ҡыҙыл емешле ағас йәки ҡыуаҡ. *Бакса сейәһе. Кыр сейәһе. Сейә баксаһы.* ■ *Көҙҙән генә ултырткан алма, сейә, ранетка агастары турайып үҫеп китте.* Ф. Иҫәнғолов. *Сейәһе сейә икән дә, яп-*

*рактары киң түгел* (Халыҡ йырынан). **Бохар сейәһе** сейәгә оҡшаш ағас һәм уның ҡыҙыл эре емеше. **Һары сейә** һары емешле бохар сейәһе.

**2.** Шул ағас йәки ҡыуаҡтың емеше. *Сейә бешә баҡсала балланып, ҡарағаттар тулып өлгөрә.* М. Хәй. *Иҫергәндәй булдым шунда әскелт сейә тәменән.* А. Баһуманов.

◆ **Бүре** (*йәки* **эт**) **сейәһе** күкшел һары сәскәле, ҡара йәки һары емешле күп йыллыҡ дарыу үләне.

**СЕЙӘБЕЙ** *и.* Турғайҙар төркөмөнә ингән һары ҡыҙыл түшле, һоро арҡалы, оҙонораҡ аяҡлы ваҡ ялан турғайы. *Киндер баштарына ҡунған ҡыҙғылт түшле сейәбей .. осоп, һиҫкәндереп ала.* С. Агиш.

**СЕЙӘГӨЛ** *и. диал. ҡар.* **ҡына** [1] 1.

**СЕЙӘЛДЕРЕҮ** *к. ҡар.* **сейәлтеү.** *Епте сейәлдереү.*

**СЕЙӘЛЕ** *с.* **1.** Сейә (1 мәғ.) үҫкән. *Сейәле битләү.*

**2.** Сейә (2 мәғ.) ҡушылған, сейә ҡушып эшләнгән. *Бер тәрилкәлә эре итеп сәнсеп индерелгән һары май, икенсеһендә сейәле май .. ҡуйылған.* Т. Хәйбуллин.

**СЕЙӘЛЕК** *и.* Сейә (1 мәғ.) күп үҫкән урын. *Әсәйем мине .. инеш ҡалҡыулығындағы сейәлеккә алып бара ине.* С. Ҡулибай.

**СЕЙӘЛЕҮ** *к.* Сырмалып, буталып төйнәлеү; сеймәлеү. *[Хәйрулла:] Еп ни тиклем генә сейәлгән булмаһын, осо була, ә уйҙың осо ла, ҡырыйы ла юҡ.* С. Агиш.

**СЕЙӘЛСЕК** *с.* **1.** Тиҙ генә сейәлеп барыусан. *Сейәлсек еп.*

**2.** *күсм.* Ҡатмарлы, аңлауы ҡыйын; буталсыҡ, сыуалсыҡ. *Сейәлсек мәсьәлә. // Күсеп ултырыу .. ер мәсьәләһендәге сейәлсектәрҙе тағы ла тәрәнәйтте.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**СЕЙӘЛТЕҮ** *к.* Аралаштырып, бутап сырмалтыу. *Арҡанды сейәлтеү. Сымды сейәлтеү.* ■ *[Хәмиҙә:] Туҡта әле, Сәлимә, күрмәйһеңме ни, мин ҡалайтып тағатырға белмәй ултырам, ә һин епте һаман сейәлтәһең.* А. Мөбәрәков.

**СЕЙӘЛӘНДЕРЕҮ** *к. ҡар.* **сейәлтеү.**

**СЕЙӘЛӘНЕҮ** [1] *к.* Сейәгә (2 мәғ.) тумалыу, сейәле (2 мәғ.) булыу. *Көҙө етмәй, көнө килмәй сейә сейәләнмәй ул* (Халыҡ йырынан).

**СЕЙӘЛӘНЕҮ** [2] *к. диал.* Сейәлеү.

**СЕЙӘЛӘҮ** *к.* Сейә (2 мәғ.) ҡушыу. *Май сейәләү.*

**СЕЙӘЛӘШЕҮ** *к. диал. ҡар.* **тартҡылашыу** 2.

**СЕКАНС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. мат.* Мөйөштөң тригонометрик функцияларының береһе — тура мөйөшлө өсмөйөштә гипотенузаның күрһәтелгән мөйөш эргәһендәге катетҡа нисбәтенән ғибәрәт.

**СЕКАТОР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ботаҡ ырҡа торған ҙур баҡса ҡайсыһы.

**СЕКВЕСТР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. юр.* Буржуаз граждандыҡ хоҡуғында: хөкүмәттең дәүләт мәнфәғәтендә ниндәйҙер милектән файҙаланыуҙы тыйыуы йәки сикләүе. *Секвестрға алыу. Секвестр һалыу.*

**СЕКВЕСТРЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **секвестрлау.** *Секвестрланған милек.*

**СЕКВЕСТРЛАУ** *к. юр.* Секвестр һалыу; секвестрға алыу. *Хөкүмәттең мөлкәтте секвестрлауы.*

**СЕКВОЙЯ** [*рус.*] *и.* Төньяҡ Америкала таралып, 2000—2500 йәшкә еткән бик мөһабәт ылыҫлы ағас.

**СЕКЕРЕШ** *с. диал. ҡар.* **беше** 1. *Секереш тауар.*

**СЕКРЕЙ** *с.* Мыҙлап янып, секрәйеп торған (күҙгә ҡарата).

**СЕКРЕТ** [1] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. хәрби* Дошман яғынан күренмәҫлек итеп ҡуйылған өҫтәмә йәшерен һаҡ. *Секретта ултырыу.* ■ *Ҡараңғы төшкәс кенә секреттар ҡуйыла.* Д. Юлтый. [*Ғаян:*] *Үҙегеҙ беләһегеҙ, секретҡа йөрөү йәки поста тороу театр ҡарарға барыу түгел.* Б. Дим.

**СЕКРЕТ** [2] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. физиол.* Кеше һәм хайуандарҙа биҙ эшләп һәм бүлеп сығарған төрлө матдә (төкөрөк, тире майы, гормондар, һ.б.).

**СЕКРЕТАРИАТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Ойошманың көндәлек ойоштороу-башҡарыу эшен алып барған бүлек. *Берләшкән милләттәр ойошмаһы секретариаты. Редакция секретариаты.* / Шул бүлектә эшләгән кешеләр төркөмө. *Секретариат ултырышы.*

**2.** Ҙур йыйылыштарҙа протокол яҙыу өсөн һайланғаи кешеләр. *Йыйылышҡа секретариат һайлау.*

**СЕКРЕТАРЛЫҠ** *и.* Секретарь эше һәм вазифаһы. *Секретарлыҡ эше. Секретарлыҡ итеү.*

**СЕКРЕТАРЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Ойошманың йәки айырым бер кешенең бөтә төр эш ҡағыҙҙарыи алып барған кеше. *Завком секретары. Газета редакцияһы секретары.* ■ *.. Хәмит кабинеты алдындағы секретарь булмаһендә ике-өс кеше бар ине.* С. Агиш.

**2.** Йыйылышта протокол алып барған кеше. *Звонок шылтыраны. Сыртланов председатель итеп үҙен, секретарь итеп беҙҙең контролёр Хәйруллинды һайлатты.* С. Агиш.

**3.** Партия, комсомол һ.б. йәмәғәт ойошмаһының һайлап ҡуйылған етәксеһе. *Генераль секретарь. Райком секретары.* ■ *Шәрәф урынына комсомол секретары итеп фермала мал ҡараған Байназар Ҡылысбаевты һайланылар.* Б. Бикбай. *Көләс йөҙлө партком секретары тора ине минең эргәлә.* Ғ. Сәләм.

**СЕКРЕТОР** [*рус.* секреторный] *с. физиол.* Секрецияға мөнәсәбәтле. *Биҙҙәрҙең секретор эшмәкәрлеге.*

**СЕКРЕЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. физиол.* Организмға тереклек өсөн кәрәк булған махсус матдәләрҙең биҙ тарафынан яһалыуы һәм бүленеүе. *Тышҡы секреция. Эске секреция.*

**СЕКРӘЙЕҮ** *к.* **1.** Аптырауҙан, ғәжәпләнеүҙән һ.б. ныҡ төбәләү (күҙгә ҡарата). *Ғизелбанат йәшәгән өйҙөң яртылаш асылған ишегенә бер баш һонолдо. Баш, секрәйеп торған күҙҙәре .. менән ярым ҡараңғы бүлмәне алан-йолан ҡарап алды.* И. Ғиззәтуллин. *Майор Стародубовтың .. әле генә асыулы секрәйеп, таҫрайып торған күҙҙәрендә йылмайыу галәмәте күренде.* Н. Мусин.

2. Бер йүнәлештә нык төбәлеп текләү. *[Карыя] күҙҙәрен дә алмай [Булатка] секрәйеп карап тора.* К. Кинйәбулатова.

**СЕКРӘЙЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **секрәйеү.** *Секрәйешеп карау.*

**СЕКРӘЙТЕҮ** *к.* Аптырап, ғәжәпләнеп һ.б. нык асып төбәү (күҙҙе). *Күҙҙәрен секрәйтеп баҫып тора.* ■ *Юныс күҙҙәрен секрәйтеп алға караған да танкыларҙы һанай ине.* Ғ. Ибраһимов.

**СЕ́КСТА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. муз.* Диатоник гаммала бирелгәндән алтынсы булып торған баҫкыс. / Бирелгән баҫкыс менән диатоник гамманың алтынсыһы араһындағы интервал.

**СЕКСТА́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Авиация һәм диңгеҙ астрономияһында кулланылған астрономик мөйөш үлсәү корамалы.

**СЕКСТЕ́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Алты инструмент йәки алты тауыш өсөн яҙылған музыка әҫәре.

**2.** *муз.* Алты башкарыусынан торған ансамбль. *Думбыра секстеты. Тынлы оркестр секстеты.*

**СЕ́КТА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* **1.** Хакимлык иткән диндән айырылған дини төркөм; мәҙһәп. *Баптистар сектаһы.*

**2.** *кусм.* Халык массаһынан айырылып, сикләнгән, тар мәнфәғәткә бикләнгән кешеләр төркөмө.

**СЕКТА́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* **1.** Дини секта ағзаһы. *Сектанттар йыйылышы.*

**2.** *кусм.* Тар төркөм мәнфәғәтенә бирелеп, догматик карашы һәм инаныуы менән айырылып торған кеше.

**СЕКТАНТЛЫК** *и.* **1.** Хакимлык иктән диндән айырылған, уға каршы торған төрлө дини төркөмдәрҙең дөйөм атамаһы.

**2.** *кусм.* Тар төркөм мәнфәғәтенә бикләнгән кешеләрҙең караш тарлығы һәм догматизмы.

**СЕ́КТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *мат.* Түңәрәктең дуға һәм ике радиус менән сикләнгән өлөшө. *Арауык секторы. Түңәрәк секторы. Шар секторы. Сектор майҙаны.*

**2.** Радиаль һыҙыктар менән сикләнгән майҙан. *Сектор сиге. Атыу секторы. Күҙәтеү секторы. Оборона секторы. Стадиондың көньяк секторы.*

**3.** Ойошманың билдәле эшкә махсуслаштырылған бүлеге. *Тел секторы. Хеҙмәт һәм эш хакы секторы.*

**4.** Халык хужалығының айырым экономик һәм социаль үҙенсәлек менән билдәләнгән тармағы. *Ауыл хужалығының колхоз секторы. Сауҙалағы шәхси сектор. Социаль сектор.*

**СЕКУНД** [*рус.* секунда ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Минуттың алтмыштан бер өлөшөнә тигеҙ булған вакыт берәмеге, халык-ара берәмектәр системаһының төп ете берәмектәренән береһе. *Биш секунд вакыт. Секунд стрелкаһы.* ■ *Тауыш-тынһыҙ үткән секундтар Сәгиҙәгә бик оҙон, ялыктыргыс булып тойолдо.* М. Тажи. *Һәр секунды сәғәт тойола.* Д. Юлтый.

**2.** Бик кыҫка вакыт араһы. *Янгол секунд эсендә уң яктағы стражниктың камсыһын тартып алды.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *муз.* Диатоник өн рәтенең икенсе баҫкысы. / Музыкаль өндөң күрше баҫкыстары яһаған интервал.

**СЕКУНДА́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Дуэлдә катнашкан кешеләр эргәһендә шаһит һәм аралашсы булып йөрөгән кеше.

**2.** *спорт* Ярышта катнашкан кешенең ярҙамсыһы һәм аралашсыһы.

**СЕКУНДЛАП** *р.* Секундтар менән һанап. *Секундлап иҫәпләү.*

**СЕКУНДОМЕ́Р** [*рус.*] *и.* Вакытты секундтың ундан бер өлөшөнә тиклем дөрөҫлөк менән үлсәгән прибор. *Ике стрелкалы секундомер. Кеҫә секундомеры. Кул секундомеры.*

**СЕ́КЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ойошманың, йәмғиәттең һ. б. билдәле бер йүнәлештә махсуслашкан бүлеге йәки бүлексәһе. *Универмагтағы аяк кейеме секцияһы. Спорт секцияһы. Шахмат секцияһы. Шиғыр секцияһы.* ■ *Тәнкитселәр секцияһын яңынан булдырыу көстәрҙе берләштерергә һәм уңышлырак эшләргә ярҙам итер ине.* Ә. Харисов. / Съезд йәки конференцияның махсус мәсьәләләр тикшерә торған бүлеге. *Секциялар буйынса эш.*

**2.** Королманың үҙ сиратында бер нисә өлөштән, бүлектән һ. б. торған өлөшө. *Йорт секцияһы. Үткәргес торба секцияһы.*

**СЕКЦИЯЛАП** *р.* Секцияһы (2 мәғ.) менән. *Йортто секциялап төҙөү. Машинаны секциялап йыйыу.*

**СЕЛ** *и.* Кор һымактар ғаиләһенә караған һорғолт, сыбар төҫлө, башы супайлы урман кошо. *[Дәүләтбай:] Юкка мылтык алмағанмын, .. бер аҙ ҫел атып алған булыр инем.* Б. Хәсән. *Юл буйҙарында карҙан өшәләк яһап, ат тиҙәге ашап йәшәгән селдәрҙән башка кош күренмәй.* Ғ. Дәүләтшин.

**СЕЛБЕГӘЙ** *с. диал.* Селбер. *Селбегәй сәскә. Селбегәй бармактар.*

**СЕЛБЕР** *с.* Тәбиғәте менән нык түгел, нәҙек кенә. *Селбер аяк.*

**СЕЛБЕРЛӘК** *с.* Нәҙек оҙон кәүҙәле, һонтор (үҫмерҙәргә карата). *Селберләк кенә бер кыҙ.*

**СЕЛБЕРЛӘҮ** *к.* Буйға нәҙек оҙон булыу. *Селберләп тә үҫкән буйҙарымды катындары үлгән тол алды* (Халык йырынан).

**СЕЛБӘРӘ** *и.* **1.** Иң вак йылға балығы. *Көндөҙ кармакка вак-төйәк селбәрә генә сиртә.* Ф. Әсәнов.

**2.** Ыуылдырыктан яңы сыккан балык балаһы; йотколок. *Суртан һыу баҫкан болондарға сығып, ыуылдырык сәсә. Бында һыу якшы йылына һәм ыуылдырыктан селбәрә тиҙ сыға.* «Совет Башкортостаны», 1970, 1 апрель.

**СЕЛГӘР** *с. диал. кар.* **кондорак** 2. *Бойҙайҙың башағы селгәр генә.*

**СЕЛЁДКА** [*рус.*] *и. кар.* **сельдь.** *Каклаған селёдка.*

**СЕЛЕК** *и.* Куҙаклылар ғаиләһенә караған вак япраклы, һары сәскәле, куҙак орлоклo вак кыуак йәки ағас. *Тау селеге. Ялан селеге.* // *Селек һепертке.* ■ *Олатайым .. һауынсыларҙың: «Һепертке юк!» — тигән зарын ишеткән дә тугайға селек кыркырға киткән.* Х. Түләкәев. *Әсе елдәр яргылаты яңағымды, селек сәнсте*

*сыр-ялангас аягымды.* Н. Иҙелбай. **Аҡ селек** аҡ, алһыу йәки һары сәскәле, ҡуҙаҡ орлоҡло ҡыуаҡ.

♦ **Бохар селеге** ҙур булып үҫә торған селеккә оҡшаш ағас; акация.

**СЕЛЕКЛЕК** *и.* Селек күп үҫкән урын. *Селеклектә сыйылып ҡалған эҙҙәр әле булһа яна балтырҙа.* Р. Бикбаев.

**СЕЛЕКТИВ** [*рус.* селективный] *с. махс.* Һайлап, айырып алыу үҙенсәлегенә нигеҙләнгән. *Селектив иреткес. Селектив һеңдергес. Машинаны селектив юл менән йыйыу. Ҡаҙылма байлыҡты селектив юл менән эшкәртеү.*

**СЕЛЕ́КТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Айырым-айырым һөйләшеүгә ҡоролған телефон бәйләнешендә килгән сигналдарҙы ҡабул иткән электромеханик ҡоролма. *[Дежурный] ҡарлыҡҡан тауыш менән селектор трубкаһына поезды ҡасан оҙатыуын һөйләргә, ике сәғәт буйына торған тауар поезын алдағы станцияның ҡабул итмәүе тураһында әйтеп, зарланырға тотондо.* Б. Дим.

**СЕЛЕКТОРЛЫ** *с.* Селектор ярҙамында башҡарылған, эшләгән. *Селекторлы элемтә.*

**СЕЛЕКЦИОНЕ́Р** [*рус.*] *и.* Селекция буйынса белгес. *Селекционерҙар семинары. Селекционерҙар эҙерләү.*

**СЕЛЕ́КЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Агрономия менән зоотехниканың кешегә кәрәк сифатлы яңы үҫемлек төрҙәре һәм мал тоҡомдары булдырыу ысулдарын өйрәнә торған бүлеге. *Селекция үткәреү. Селекция станцияһы. Селекция эштәре.*

**2.** Ауыл хужалығының яңы үҫемлек төрҙәре һәм мал тоҡомдары сығарыу менән шөғөлләнгән тармағы. *Селекция юлы менән алынған бойҙай сорты.*

**СЕЛЕМ** *и.* Төтөндө һыу аша һура торған оҙон төрөпкә. *Мөштөклө селем.*

**СЕЛЕ́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Химик элемент, ярым үткәргес сифатына эйә булған буҙ төҫтәге кристаллик матдә.

**СЕЛЕНИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Гипстың төрлө нәмә яһау өсөн ҡулланылған ялтырауыҡлы ҡыҙғылт һары төҫтәге бер төрө, минерал.

**СЕЛИ́ТРА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Аммоний, калий, кальций, натрий һ. б. һелтеле металдар нитратының дөйөм атамаһы. *Аммоний селитраһы.*

**СЕЛИТРАЛАУ** *к.* Селитралы итеү, селитра ҡушыу. *Тупраҡты селитралау.*

**СЕЛИТРАЛЫ** *с.* Составында селитра булған. *Селитралы кислота.*

**СЕЛЛӘ** [*фарс.*] *и.* Йылдың иң эҫе йәки иң һыуыҡ ҡырҡ көнлөк осоро. *Селлә һыуығы. Селлә эҫеһе. Селлә башланыу.* ■ *[Ғәлимә:] Тауыҡ тимәһәң, хәтерҙәре ҡалыр, селлә уҙмаҫ уҡ йомортҡа һалыуҙан туҡтаны.* А. Таһиров. **Йәй селләһе** *йәки* **йәйге селлә** 25 июндән 5 августа тиклем булған иң эҫе ҡырҡ көнлөк осор. *Ошо буйҙағы ҡуләгәләргә ултырып, йәйге селләләрҙә юлсылар ял итә.* Ғ. Вәлиев. **Ҡыш селләһе** *йәки* **ҡышҡы селлә** 25 декабрҙән 5 февралгә тиклем булған иң һыуыҡ ҡырҡ көнлөк осор. *Беҙ бәләкәй саҡтарҙа, ниңәлер, ҡышҡы селләнең көндәре хәҙергегә ҡарағанда зәһәрерәк, бурандары уҫалырак .. була торғайны шул.* Ғ. Ибраһимов. *Ҡыш селләһе тәҙрәләргә сихри сәскәләр һона, ә уларға, күбәләктәй, аҡ ҡар бөртөгө ҡуна.* Р. Ғарипов.

**СЕЛНИСӘ** *и. диал.* Һелкәүес.

**СЕЛПӘРӘ** [*фарс.*] *р. ҡар.* **селпәрәмә.** *Сынаягым селпәрә килде.*

**СЕЛПӘРӘМӘ** [*фарс.*] *р.* Ваҡ-ваҡ киҫәктәргә бүленеп, киҫәк-киҫәк булып. *Ҡарттың .. ҡулындағы туҫтағы, иҙәнгә төшөп китеп, селпәрәмә онталған.* Т. Йәнәби. *Суйын суҡмар [Ҡамыр батырҙың] башына осоп килеп бәрелеп, селпәрәмә ватылған да тирә-яҡҡа сәсрәп киткән* (Әкиәттән).

□ **Селпәрәмә килеү** 1) ваҡ-ваҡ киҫәктәргә бүленеү, онталыу. *Фатима йән асыуы менән өҫтәлгә шундай ҡаты итеп һуҡты, хатта ҡара һауыты иҙәнгә төшөп, селпәрәмә килде.* Б. Бикбай. *Урам уртаһында снаряд ярылып, уның шартлауынан тәҙрәләр селпәрәмә килде.* Б. Хәсән; 2) *күсм.* юҡҡа сығыу, юҡ булыу. *[Байназаров:] Әгәр ҙә аҙ ғына һаҡһыҙлыҡ күрһәтеп, ҡала йәмәғәтселегенә, судья Ғәлиәкбәров улын ҡотҡарыуҙы юллап йөрөй, тигән һүҙ тарала икән, һеҙҙең абруйығыҙ .. селпәрәмә киләсәк.* Х. Зарипов. *Йәнгәли хафаға ҡалды: .. мәсьәләне уңай хәл итеп булмаҫмы икән ни? Бөтә пландар селпәрәмә килә бит.* Н. Ҡотдосов. **Селпәрәмә килтереү** 1) ваҡ-ваҡ киҫәктәргә бүлеү, онтау. *Унда шәшкеләр ватып, бында урындыҡтар ватып, тәҙрәне селпәрәмә килтереүҙәр бар ине.* Ш. Бабич; 2) *күсм.* юҡҡа сығарыу, юҡ итеү. *[Ғафур:] Һуғыш беҙҙең хыялдарҙы селпәрәмә килтерҙе.* Ш. Янбаев.

**СЕЛТ** *оҡш. ҡар.* **сылт**[1]. *Селт итеп килә асылды. Сәғәт селт итеп һуға.*

**СЕЛТЕЛДӘҮ** *к. ҡар.* **сылтылдау.**

**СЕЛТЕР** *оҡш. ҡар.* **сылтыр** 1. *Быяла селтер итеп ҡойолоп төштө.*

**СЕЛТЕРЛӘҮ** *к. ҡар.* **сылтырау.** *Селтерләп аҡҡан йылға. Селтерләп торған тәңкә.*

**СЕЛТЕРӘТЕҮ** *к. ҡар.* **сылтыратыу.**

**СЕЛТЕРӘҮ** *к. ҡар.* **сылтырау.** *Сынйыр селтерәй. Шишмә селтерәй.*

**СЕЛТЛӘҮ** *к. ҡар.* **сылтлау.** *Сәғәт селтләп йөрөп ята.*

**СЕЛТӘР** *и.* **1.** Тигеҙ итеп йәки биҙәкләп туҡылған, бәйләнгән эре күҙле, үтә күренмәле еңел туҡыма (ғәҙәттә тәҙрә пәрҙәһе итеп, күлдәк биҙәү һ. б. өсөн ҡулланыла). *Селтәр энәһе. Тәҙрә селтәре. Селтәр элеү. // Селтәр алъяулыҡ. Селтәр ситле алъяулыҡ. Селтәр яға.* ■ *Ул арала горничная Клава, селтәр ситле аҡ алъяпҡыс, аҡ башлыҡтар кейеп, тағы ла ялт итеп килеп етте.* Һ. Дәүләтшина. *Башына аҡ селтәр шәл бөркәнгән бер ҡыҙ килеп сыҡты.* Т. Йәнәби.

**2.** *этн.* Ҡатын-ҡыҙҙың яурынға һала, түшкә бәйләй торған шуға оҡшаш биҙәүесе. *Селтәр бәйләү. Селтәр кейеү. Селтәр һалыу.* ■ *Таҡмаҡ ыңғайына ҡашмау, селтәрҙән кейенгән ҡыҙҡырҡын ер һелкетеп бейей.* Т. Хәйбуллин. *[Ғариф] ике арбаға ике атты ектерҙе лә үҙе йәшел ебәк селтәрҙе елкәһенә һалған сибәр Сәхибәһе менән ултырҙы.* Ғ. Хәйри.

**3.** Шуға оҡшатып киҫелгән төрлө нәмә. *Самауырҙың боҫо балалар епкә теҙеп түбәгә*

*элгән ҡағыҙ селтәрҙәрен, суҡтарын елпелдәтте.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Арҡыс-торҡос үреп, бәйләп, төрлө маҡсат өсөн яһалған нәмә. *Әҙерләгәс, тотош әҙерләп бирәйем инде тип, мин селтәр менән мәкенән боҙ киҫәктәрен һирпеп түгергә керештем.* Ф. Иҫәнғолов.

**5.** Металл һ. б. киҫәктәренән арҡыс-торҡос беркетелгән рәшәткә. *Купер селтәре.* ■ *Мин палубаның тимер селтәренә таянып, пароходты оҙатып пристанда ҡалған .. халыҡҡа ҡараным.* Ғ. Хәйри. / Утлы нәмәнең һауа үтә торған тишекле-тишекле өлөшө. *Самауыр селтәре. Шәм селтәре. Мейес селтәре.*

**6.** Ҡайҙалыр урынлашҡан юлдар, йылғалар, каналдар һ. б. системаһы. *Йылғалар селтәре. Йырындар селтәре. Контакттар селтәре. Телефон селтәре. Тимер юл селтәре. Элемтә селтәре.* ■ *Республикабыҙ электр тапшырыу линияларының ҡуйы селтәре менән капланган.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 22 декабрь.

**7.** *күсм.* Төрлө ерҙә урынлашып, дөйөм эш үтәгән төрлө бер иш ойошмалар һ. б. системаһы. *Мәктәп селтәре. Политик мәғариф селтәре. Сауҙа селтәре.* ■ *Республикала кинотеатр һәм музейҙар селтәре, ә һуңғы йылдарҙа телевидение киң тарала.* М. Хисмәтов.

**СЕЛТӘРЛЕ** *с.* **1.** Селтәрҙән (1 мәғ.) эшләнгән. *Селтәрле күлдәк.* ■ *Гөл сәскәләре өй эсенә, шулай уҡ ап-аҡ селтәрле пәрҙә аша урамға ла йәмен сәсә.* Ғ. Хәйри.

**2.** Селтәрләп, биҙәп эшләнгән. *Селтәрле купер. Селтәрле тәҙрә.* ■ *[Яубикә — Ҡарабашҡа:] Ер һаткастын, алдаҡ кағыҙ яҙып, күпме тоттоң халыҡ аҡсаһын?.. Ул якшы өй, селтәрле саналар, .. шул аҡсаға килде түгелме?* Б. Бикбай. *[Билалов — Сабирга:] Йәшәгән өйөң емерелеп барһа, йортоңа селтәрле ҡапҡа яһап ҡуйыу .. күңелде шатландырмайҙыр ул?* Д. Исламов.

**СЕЛТӘРЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **селтәрләү** 1, 2. *Селтәрләнгән күлдәк. Селтәрләнгән сана. Селтәрләнгән тәҙрә. Республика тимер юлдар менән селтәрләнгән.*

**СЕЛТӘРЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Селтәрле (4 мәғ.) итеү. *Селтәрләп шәл бәйләү.*

**2.** Арҡыс-торҡос итеп, сатраштап нимә менәндер биҙәү. *Сананы селтәрләү. Тәҙрәне селтәрләү.*

**3.** Арҡыс-торҡос киҫеп үтеү. *Тимер юлдар киң япан, иркен далаларҙы .. селтәрләгән.* А. Таһиров. *Япраҡтар аша төшкән нур селтәрләй урман эсен.* М. Сөндөклө.

**4.** *күсм.* Тишек-тишек итеп тишкеләү. *Ҡояш нуры .. селтәрләне ҡаты ҡарҙарҙы.* Ғ. Ғүмәр. *Граната ярсыҡтары Кәримдең тәнен селтәрләне.* Ә. Ихсан.

**СЕЛЬДЬ** [*рус.*] *и.* Атлантик һәм Тымыҡ океандарҙың төньяҡ өлөшөндә йәшәгән ялпаҡ ғырыҡ кәүҙәле, аҡһыл күк төҫлө, бик үк эре булмаған диңгеҙ балығы (ғәҙәттә тоҙлап йәки ыҫлап ашайҙар). *Атлантика сельде.*

**СЕЛЬКО́Р** [*рус.*] *и.* Ауыл хәбәрсеһе. *«Известия» газетаһы үҙенә байтаҡ ҡына подписчиктар йыйып, беренсе рабкор, селькорҙар менән бәйләнеш башланы.* Т. Йәнәби. *Лампа яна, тышта таң уяна, селькор һаман яҙыу өҫтөндә.* Ғ. Мәсғүт.

**СЕЛЬМА́Г** [*рус.*] *и.* Ауыл магазины. *Сельмаг раймагтың ҡаршыһында урынлашҡан. Сельмагҡа тауар килгән.*

**СЕЛЬПО́** [*рус.*] *и.* Ауыл потребителдәр йәмғиәте һәм шул йәмғиәттең кооператив магазины. *Сельпонан тауар һатып алдым.*

**СЕЛӘН** *и.*, аҡ селән Оҙон аяҡлылар ғаиләһенә ҡараған оҙон кәкре муйынлы, оҙон суҡышлы, аҡ буҙ төҫлө, оҙон ҡара ҡауырһын ҡашлы эре һыу ҡошо. *Ҡоба селән. Ҡыҙыл селән.* ■ *Тәлмәрйен шулай һүҙ ҡушты селәнгә: тәбиғәт һис йәлләмәгән буйыңды, бер үҙеңә ун һайыҫҡан муйыны, аяғыңды, әйтер инем, тирәктәй, бындай суҡыш булһа булыр өйрәктә.* Ш. Бикҡол.

**СЕЛӘҮ** *и. һөйл.* Селәүсен. *Селәү ҡатыу.*

**СЕЛӘҮЛӘҮ** *ҡ.* Ҡармаҡҡа селәүсен ҡатыу. *Боҫа-боҫа мин .. селәүләп ҡармаҡ һалам.* Ғ. Дәүләтов.

**СЕЛӘҮСЕН** *и.* **1.** Ерҙе йырып йөрөй торған йомро, оҙон, умыртҡаһыҙ ҡыҙыл ҡорт; селәү. *Балыҡҡа барырға булып, селәүсендәрҙе кистән уҡ ҡаҙып, ҡармаҡтарҙы .. әҙерләп ҡуйҙыҡ.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Кеше һәм хайуандарҙың эске ағзаларында була торған паразит ҡорт. *Суска селәүсене. Таҫма селәүсен.*

**СЕМ** [1] *киҫ. ҡар.* **сөм** [2]. *Сем аҡ. Сем ҡыҙыл.*

**СЕМ** [2] *окш.* Һыуыҡҡа ауыртып, сәңгеп киткәнде белдергән һүҙ. *Ғәфүрҙең танау осо һыуыҡҡа сем итеп ҡуйҙы.* С. Агиш.

**СЕМАНТИК** *с. лингв.* Семантикаға (1 мәғ.) бәйле. *Семантик категория. Семантик мөнәсәбәт. Семантик система. Һүҙгә семантик анализ.*

**СЕМА́НТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. лингв.* **1.** Һүҙҙең, грамматик форманың мәғәнәһе. *Грамматик семантика. Синтаксик семантика. Тел семантикаһы.* ■ *Профессор Н. К. Дмитриев һүҙҙәрҙе төркөмдәргә бүлеүҙә һүҙ семантикаһының урыны хәл иткес булып тора тип ҡараны.* Н. Ишбулатов.

**2.** Тел ғилеменең һүҙ һәм әйтемдәрҙең мәғәнәләрен, был мәғәнәләрҙең үҙгәрешен өйрәнгән бүлеге; семасиология.

**СЕМАСИОЛОГИК** *с.* Семасиологияға мөнәсәбәтле. *Семасиологик тикшеренеүҙәр.*

**СЕМАСИОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тел ғилеменең һүҙ һәм әйтемдәрҙең мәғәнәләрен, был мәғәнәләрҙең үҙгәрешен өйрәнгән бүлеге; семантика.

**СЕМАФО́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Тимер юлда бағанаға һ. б. асылып-ябылмалы ҡанат йәки төрлө төҫтәге уттар ҡуйылған сигнал ҡорамалы. *Семафор асыҡ.* ■ *Семафорҙа йәшел ут күренеү менән машинист паровоз рычагына баҫты. Ауыр состав әкренләп ҡуҙғалды.* Ә. Ихсан. *Семафорҙарҙың йәшел, ҡыҙыл уттары, төн ябалағының күҙе төҫлө, селт-селт килеп бер асылып, бер йомолоп тора* М. Тажи.

**2.** *диңг.* Караптарға сигнал бирер өсөн яр башына бағанаға һ. б. ҡуйылған ҡорамал.

**3.** *диңг.* Флаг тотҡан ҡул менән төрлө шартлы хәрәкәттәр аша сигнал биреү ысулы.

**СЕМАФОРСЫ** *и. диңг.* Флаг менән шартлы хәрәкәттәр аша сигнал биргән кеше. *Семафорсы флагы. Семафорсы азбукаһы.*

**СЕМГӘН** *и.* Роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған теҙелеп торған киртләс-киртләс япраҡлы, төрлө төҫтәге сәскәле һыу буйы үләне.

**СЕМЕР** *окш.* Тәндә нимәлер йөрөгән һымаҡ булғанды йәки өшөгәндәге кеүек тән ҡалтырап киткәнде белдергән һүҙ. *Тән семер итеп китте.*

**СЕМЕРЛӘТЕҮ** *к.* **1.** Семер иттереү, семер-семер килтереү. *Рәшиҙә шишмә һыуы менән битен йыуҙы, һыуын тештәрен семерләткәнсе услап-услап йотто.* З. Ураҡсин. *Арҡам буйлап һалҡын йүгереп үтте, семерләтте хатта йөрәкте.* Ш. Бикҡол.

**2.** *кар.* **бызырлатыу.** *Һыуҙы семерләтеп таш ырғытыу.*

**СЕМЕРЛӘҮ** *к.* **1.** Семер итеү, семер-семер килеү. *Дәрестән һуң класс йыйылышы булаһын белгәс, Хәйҙәр менән Хатиптың тәндәре семерләп китте.* Ф. Иҫәнғолов. *Тән семерләп китте, ә ҡулдарым тотондолар ҡайраҡ таштарға.* Ғ. Сәләм.

**2.** *кар.* **бызырлау.**

**СЕМЕР-СЕМЕР** *окш.* Ҡабат-ҡабат семер иткәнде белдергән һүҙ. *Семер-семер итеү. Семер-семер килеү.* ■ *[Ғәлим:] Һаумы, ҡәйнәм. Ҡымыҙ нисек булды? [Нәжибә:] Әлләсе, аяҡтарға тиклем семер-семер төшөп китте инде.* И. Абдуллин.

**СЕМЕ́СТР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Юғары һәм махсус урта уҡыу йорттарында уҡыу йылының зачёт, экзамен биреү менән тамамланған яртыһы. *Семестр экзамены.* ■ *Бишенсе курстар, һынауҙарҙан һуң ял итеп, алдағы семестрҙы башлап та ебәрҙе.* Р. Шәкүр. *Экзамендарҙан һуң .. уҡыу семестры бөтөп, хеҙмәт семестры башланды.* Р. Солтангәрәев.

**СЕМЕТЕҮ** *к. кар.* **семтеү.**

**СЕМИНА́Р** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Юғары уҡыу йортонда студенттарҙың махсус бер фән буйынса төркөм менән үткәргән эше. *Семинар дәресе. Семинар үткәреү. Семинарға әҙерләнеү.* ■ *Эш өҫтөндә һиңә уҡыу ҡайҙа? Урыҡ-һурыҡ уҡыһаң, уҡыйһың .. Шуға ҡасан-ҡасан дертләй йөрәк семинарға барған уңайҙа.* Ғ. Амантай.

**2.** Квалификацияны, идея һәм политик кимәлде күтәреү өсөн төркөм менән үткәрелгән махсус дәрес. *Методик семинар. Теоретик семинар. Пропагандистар семинары.*

**СЕМИНАРИ́СТ** [*рус.*] *и.* **1.** Семинария уҡыусыһы.

**2.** Семинарияла белем алған, уны тамамлаған кеше.

**СЕМИНА́РИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Революцияға тиклемге Россияла педагогик урта уҡыу йорто. *Өфө губернаһында ике генә уҡытыусылар семинарияһы була.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1967, № 11.

**2.** Дини урта уҡыу йорто. *Дини семинария.*

**СЕМИО́ТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тамғалар үҙенсәлеген һәм тамға системаларын тикшергән фән.

**СЕМИ́Т** *и.* Алғы Азия, Төньяҡ һәм Көнсығыш Африканың бер өлөшөндә элек һәм хәҙерге көндә йәшәгән халыҡтар (боронғо вавилондар, ассирийҙар, финикийҙар, иудейҙар һәм хәҙерге ғәрәптәр, еврейҙар, эфиоптар һ. б.) төркөмө. *Көнбайыш семиттар. Көнсығыш семиттар. Семит телдәре.*

**СЕМИТИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Семит телдәренең береһенән үҙләштерелгән һүҙ йәки әйтем.

**СЕМЛӘТЕҮ** *к.* Сем [2] иттереү. *Закир тешен семләтеп торған һалҡын айранды һемереп эсеп бөттө лә туҫтаҡты еңгәһенә һуҙҙы.* З. Биишева.

**СЕМЛӘҮ** *к.* Сем [2] итеү. *Теш семләй.*

**СЕМСЕК** *с.* Һайланып, семсенеп кенә ашаусан. *Семсек кеше. Семсек мал.*

**СЕМСЕНЕҮ** *к.* Әҙ-әҙләп кенә семтеп ҡабыу. *Семсенеп ашау.* ■ *Башта семсенеп кенә [ултырған Ғәфүр һуңынан] .. бөтә ризыҡты һыпырып ашап бөттө.* Ғ. Шәрипов. *[Болан балаһы] ағас япраҡтарын семсенгән була.* М. Ғафури. *Наилә, яңы ғына ашағайным, тип, семсенеп кенә ултырҙы.* Ғ. Ибраһимов.

**СЕМТЕКЛӘҮ** *к.* Унан-бынан тешләү, семтеү, талау. *Көн эҫеһендә мең төрлө себен-серкәйҙәр бызылдашып, аттарҙың бауыр аҫтарынан, .. күҙ тирәләренән тешләклән, семтеклән кит[ә].* Ғ. Дәүләтшин.

**СЕМТЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **семтеү** 1. *Беләктәге семтелгән урын.*

**СЕМТЕМ** *и.* **1.** Бер семтеп алырлыҡ күләм. *Бер семтем сәй. Бет семтем тоҙ.* ■ *Егет .. бер семтемдәй насыбай алып, .. аҡҡы ирене менән теше араһына һалып ебәрҙе.* М. Ғафури.

**2.** *күсм.* Бик әҙ генә, бәләкәй генә күләм. *[Шәйхи:] Сыбырткыны әҙерләп ҡуйған Фәрхиәне әйтәм. Ҡайҙан тапкан тиген, ҡыйыҡ аҫтына ҡыҫтырып ҡуйған нәмәне. Мә, ти, бер семтем гонаһымды тапһаң, ҡайыҙла, ти.* Х. Ғиләжев. *Котлет тигән нәмәһенән тапманым бер семтем ит.* Ғ. Дәүләтов.

**СЕМТЕМЛӘП** *р.* Семтем-семтем итеп. *Тоҙҙо семтепләп һалыу.*

● *Семтемләп йыйһаң, услап ашарһың.* Әйтем.

**СЕМТЕТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **семтеү** 1.

**СЕМТЕҮ** *к.* **1.** Тәнде бармаҡ остары менән эләктереп ҡыҫып ауырттырыу. *Үҙенең уяу икәнлегенә ышанмай, ботон семтеп ҡараны.* Я. Хамматов. *Хәйҙәр .. Хатиптың беләген семтеп алды.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Ирендәр ярҙамында ялмап йәки суҡыш менән эләктереп алыу (үләнде һ. б.). *Тирәяҡта семтеп алырлыҡ үлән юҡ ине, шуңлыҡтан .. аттарҙы ашатыу бигерәк ҡыйынға тура килде.* Т. Кусимов. *Ҡаҙҙар .. үлән семтеп ҡалды.* М. Ғәли.

**3.** Бармаҡ остары менән ҡымтып тотоу. *Ҡарт .. махоркаһын семтеп-семтеп үҙе өләшеп сыға.* Р. Низамов.

**4.** Ауыртыу, әсетеү тойғоһо барлыҡҡа килтереү. *Туң тимер ҡулдарҙы өҙҙөрөп семтеп ала, әрнеүе йөрәккә төшә.* Ә. Байрамов. *Ҡар ҡатыш ямғыр яуа, ҡар бөртөктәре бит итен семтеп-семтеп ала.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**5.** *кусм.* Ниндәйҙер ауыр тойғо, әрнеү уятыу, борсоу. *Юлдаштың йөрәген нимәлер семтеп алған һымак булды.* З. Биишева.

**СЕМТЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **семтеү** 1.

**СЕМЬЯ́** [*рус.*] *и. кар.* **ғаилә** 1.

**СЕМӘЙ** *и. диал. кар.* **семәр** 1. *Семәйле көрәгә.*

**СЕМӘЙЛӘҮ** *к. диал. кар.* **семәрләү** 1. *Семәйләп эшләнгән эйәр. Семәйләп буяу.*

**СЕМӘКӘЙ** *с. диал.* Семәрле. *Семәкәй балдак.* ■ *Көмөш кенә балдак семәкәй, уң бармакайыма бәләкәй* (Халык йырынан).

♦ **Сем-сем семәкәй, кана миңә бәләкәй** баласаға араһында: күҙҙе йомоп, кулды һоноп, бер нәмә һорағанда әйтелә. **Семәкәй күҙ** томаланып, насар күргән күҙ.

**СЕМӘКӘЙЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **семәкәйләү**. *Диңгеҙ өҫтө, ынйы һибелгән беләҙек кашы шикелле семәкәйләнеп,.. йымылдап ята.* З. Биишева. *Зыңкытып баш һыҙлап куйҙы, иҫерек кеше һымак, күҙ алды семәкәйлән[де].* Н. Кәрип.

**СЕМӘКӘЙЛӘҮ** *к. диал.* Семәрләү. *Кыҙҙарҙың өҫтөндә .. балак остары семәкәйләп сигелгән кыҙыл ыштан.* З. Биишева. *[Ынйыкайға] семәкәйләп тегеп, куш-куш итек, кәлмәрйендән елән тектерҙек.* Х. Ғәбитов.

**СЕМӘР** *и.* **1.** Шыма ағас, тимер йәки башка йөҙлөккә сокоп, уйып төшөргән биҙәк. *Семәр менән биҙәү.* ■ *Мин көршәкте бик оҙак әйләндереп-түлгәндырып карап ултырҙым. Уның нәфислеген, матурлығын, сәскә һәм семәрҙәренең гүзәллеген [күреп], бөтөнләй юғалып калам.* З. Биишева. *Көршәктең өҫтө бик матур итеп семәр менән биҙәкләнгән.* Н. Мәжитов.

**2.** *кар.* **кузыр** 1.

**СЕМӘРЛЕ** *с.* Семәр (1 мәғ.) менән биҙәлгән. *Семәрле күнәк. Семәрле һандык.* ■ *Катынкыҙҙың өҫтөндә салғый-сабыуы, ягаһы семәрле һырма көпө.* С. Кулибай. *Зөлхизә .. ахырҙа был бәхетле көн [күрешеү көнө] еткәс, биҙәкле биҙәләрен аҫып, семәрле көйәнтәһен көйәнтәләп, йәнәһе, Түңәрәк кыуакка һыуга килгән.* Н. Иҙелбай.

**СЕМӘРЛӘНЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **семәрләү**. *Семәрләнгән ултырғыс.* ■ *Эйәр кашы алтындан, семәрләнгән акыктан* (Кобайырҙан).

**2.** Ала-сола булып сыбарланыу. *Сәғиҙәнең күҙ алдары семәрләнеп, йорт эсе караңғыланып киткәндәй булды.* М. Тажи.

**СЕМӘРЛӘҮ** *к.* **1.** Семәр (1 мәғ.) менән биҙәү, семәрле итеү. *Семәрләп эшләү.* ■ *Йәшел түбәле өй матурлап, семәрләп эшләнгән.* Б. Хәсән. *Шаһығәлиҙең колағы карпайҙы. Ул, бәке осо менән семәрләп булашкан таяғын ситкә куйып, тыңлай башланы.* Ш. Янбаев.

**2.** *кар.* **кузырлау** 1.

**СЕНА́Ж** [*рус.*] *и.* Махсус башняла һакланып, малға ашатыу өсөн бер аҙ һурыктырып, консервалап һалынған үлән.

**СЕНА́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Боронғо Римда юғарғы властың дәүләт органы. *Сенат ағзаһы. Сенат карары.*

**2.** Революцияға тиклемге Россияла: юғарғы суд функцияһын үтәгән, хөкүмәт аппаратының эшмәкәрлеген күҙәткән орган. *Суд карарына сенатка ялыу яҙыу.*

**3.** Күп кенә сит илдәрҙә (Бельгия, Ирландия, Италия, Франция, АКШ, Канада, Мексика, Бразилия һ. б.) парламенттағы юғарғы палата атамаһы.

**СЕНА́ТОР** [*рус.*] *и.* Сенат ағзаһы.

**СЕНАТОРЛЫК** *и.* Сенатор эше, сенатор дәрәжәһе. *Сенаторлык вазифаһы.*

**СЕНСАЦИОН** [*рус.* сенсационный] *с. кар.* **сенсациялы.**

**СЕНСА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Ниндәйҙер хәл-вакиға йәки хәбәрҙең шак катырғыс көслө тәьҫире. *Сенсация яһау.*

**2.** Шундай тәьҫир уяткан хәл-вакиға йәки хәбәр. *Беҙҙең тапкан мал улар [килгән һалдаттар] өсөн сенсация булды. Шул кәйеф менән беҙ күңелләнеп, яңынан юлға сыктык.* Д. Юлтый.

**СЕНСАЦИЯЛЫ** *с.* Сенсация тыуҙырған, сенсация яһаған. *Сенсациялы еңеү. Сенсациялы хәбәр.* ■ *[Архипов:] Ризамын, [мәкәлә] һәйбәт яҙылған. Берәй дыуамал редактор кулына барып эләкһә, бик елле сенсациялы материалға әйләнер ине.* Б. Рафиков.

**СЕНСЕК** *и. диал.* Енсек.

**СЕНСУАЛИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Танып белеү теорияһында һиҙемде ысын белемдең нигеҙе һәм төп формаһы тип танытан йүнәлеш.

**СЕНСУАЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* Сенсуализм яклы кеше.

**СЕНСУАЛИСТИК** [*рус.*] *с.* Сенсуализмға, сенсуалиска мөнәсәбәтле. *Сенсуалистик йүнәлеш. Сенсуалистик караштар.*

**СЕНСУАЛЬ** [*рус.* сенсуальный ⟨ *лат.*] *с. кит.* Үҙ тойғоңа, үҙ һиҙемеңә нигеҙләнгән. *Сенсуаль тәжрибә.*

**СЕНТЕ́НЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* Өгөтнәсихәткә нигеҙләнгән, королған һүҙ һ. б.

**СЕНТЕНЦИЯЛЫ** *с. кит.* Сентенцияға нигеҙләнгән; өгөт-нәсихәткә королған. *Сентенциялы мәкәлә. Сентенциялы сығыш.*

**СЕНТИМЕНТАЛИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* 18 быуаттың икенсе яртыһында — 19 быуат башында әҙәбиәттә һәм сәнғәттә рухи донъяға, тәбиғәткә айырыуса иғтибар биргән, шул ук вакытта ысынбарлыкты идеаллаштырып, хис уятырлык итеп һүрәтләгән ағым. *Рус сентиментализмы. Француз сентиментализмы.*

**СЕНТИМЕНТАЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* Сентиментализм вәкиле.

**СЕНТИМЕНТАЛЛЕК** *и.* Артык тойғоға бирелеп, эҫәрләнеп барыусанлык. *Сентименталлек күрһәтеү.*

**СЕНТИМЕНТАЛЬ** [*рус.* сентиментальный ⟨ *фр.*] *с.* **1.** Сентиментализмға нигеҙләнгән. *Сентименталь эҫәр.*

**2.** Хискә бирелеп барыусан. *Сентименталь герой. Сентименталь кеше.* / Хискә, тойғоға бай. *Сентименталь шиғыр.*

**СЕНТЯ́БРЬ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Календарь йылдың туғыҙынсы айы (*кар.* **календарь**). *Иртәгә 1 сентябрь, укыуҙар башлана.* Н. Мусин.— *Әйҙә, киттек Өфөгә!.. Көҙгә, сентябргә, өҫ-башты рәтләп килербеҙ.* С. Агиш.

● *Сентябрҙә һин дә бер, мин дә бер.* Әйтем.

**СЕҢ** [1] *и. кар.* **сеңләү** [1]. *Минең үтенесем буйынса Миңлеямал апай сең һөйләй.* М. Хәй.

**СЕҢ** [2] *окш.* Тимер, быяла кеүек нәмәләргә һуҡҡанда йәки улар бер-береһе менән бәрелешкәндә һ. б. яңғырап сыҡҡан нәҙек тауышты белдергән һүҙ; сың. *Сең итеү. Сең иттереү.* ■ *Сеңгел-сеңгел ... сең .. Йәнле ҡылдар сиртелде — яңғыраны сағыл буйлата.* Т. Йәнәби.

**СЕҢГЕЛДӘТЕҮ** *ҡ.* Сеңгел-сеңгел иттереү, сеңгел-сеңгел килтереү. *Ҡыңғырау сеңгелдәтеү.*

**СЕҢГЕЛДӘҮ** *ҡ.* Сеңгел-сеңгел итеү, сеңгел-сеңгел килеү. *Сеңгелдәп китә котелок — һыуға барамы һалдат.* Н. Нәжми.

**СЕҢГЕЛ-СЕҢГЕЛ** *окш.* Бәләкәй еҙ ҡыңғырау тауышын йәки тимер һуҡҡанда һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Сеңгел-сеңгел итеү. Сеңгел-сеңгел килеү.*

**СЕҢГӘРСӘЙ** *и. диал.* Сыңғарсай.

**СЕҢГӘСӘЙ** *и.* Өй тирәһендә күпләп үрсегән ҡара төрткөлө ҡанатһыҙ ҡыҙыл бөжәк. *Ҡара биҙәк төшкән сәкмәндәрен ябынып, сеңгәсәйҙәр ҡояшта ҡыҙынырға сыҡҡан.* З. Биишева. *Өй артындағы ҡыҙыл сеңгәсәйҙәр, ямғырҙан ҡасып торған бурәнә ярыҡтарынан ҡуҙғалып, йәнә ҡояшҡа ҡыҙынырға сыҡты.* Ш. Янбаев.

**СЕҢЛӘТЕҮ** [1] *ҡ. йөкм. кар.* **сеңләү** [2]. *Ҡыҙҙы таң алдынан табып алып ҡайтып, шул көндө үк туй яһағандар. Иртәгеһен инде сеңләтеп кейәү йортона оҙатҡандар* (Хикәйәттән). *Сеңләтеп тә биреп ебәргәнсе, гәзиз йәндәремде ал, еңгә* (Сеңләүҙән).

**СЕҢЛӘТЕҮ** [2] *ҡ.* Сең [2] иттереү, сең-сең килтереү. *Сеңләтеп ҡыңғырау ҡағыу. Сеңләтеп миҙалдар тағыу. Сеңләтеп скрипка уйнау.* ■ *Ҡыҙ тураһында яманат һатып йөрөүсе әбейҙәр ҙә, албаҫты кеүек күҙ алдына килде, уларҙың һүҙҙәре ҡолаҡты сеңләтте.* Б. Хәсән.

**СЕҢЛӘҮ** [1] *и.* Кейәүгә бирелгән ҡыҙҙың ата йортонан оҙатылғанда ата-әсәһенә, туғандарына үпкәһен, зарын белдереп йырлаған хушлашыу йыры. *[Үҙе теләмәгән кейәүгә, алыҫ һәм ят ергә, малға һатып бирелеүгә] ҡаршы башҡорт ҡыҙы йола йыры — сеңләү менән генә яуап бирә алған.* Ф. Нәҙершина. *Сеңләүҙәр .., һис шикһеҙ, талантлы башҡорт шағирәләре тарафынан ижад ителгән.* Ж. Кейекбаев.

**СЕҢЛӘҮ** [2] *ҡ.* **1.** Кейәүгә биргәндәренә әсенеп, үҙенә бер төрлө көй менән йырлай-йырлай зарланыу, сең йырлау (ҡыҙҙарға ҡарата). *[Ҡыҙҙар кейәү] егеттең насарлығын йә ҡартлығын аңлатып сеңләй.* М. Буранғолов.

**2.** Зарлы тауыш менән һыҡтау. *Сеңләп илау.* ■ *[Гәрәй:] Әсемде бошороп, бисәләр һымаҡ сеңләп ултырма әле.* Б. Бикбай.

**СЕҢЛӘҮ** [3] *ҡ.* Сең [2] итеү, сең-сең килеү. *Кемдер килә. Аттары аҡ күбеккә төшкән. Ҡыңғырауҙары сеңләп .. һуға.* Т. Хәйбуллин. *Капитандың .. түшендәге Ҡыҙыл йондоҙ һәм Ватан һуғышы ордендары ҡояшта ялтыраны, миҙалдары бер-береһенә бәрелеп .. сеңләп ҡуйҙы.* Ә. Байрамов. / Сең иткәндәй тауыш ишетелеү (ҡолаҡҡа ҡарата). *Бәҙерниса әбей сәй әскәндә ҡапыл сеңләп китте ҡолағы.* Ғ. Дәүләтов.

**СЕҢЛӘШЕҮ** *ҡ. урт. кар.* **сеңләү** [2].

**СЕҢ-СЕҢ** *окш.* Ҡабат-ҡабат сең [2] иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сең-сең итеү. Сең-сең килеү.* ■ *Сең-сең иткән тауышҡа уянып киттем. Тышҡа сыҡһам, әсәйем салғы сүкеп ултыра икән.* Я. Вәлиев.

**СЕП-** *киҫ.* Се- ижеге менән башланған төп сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһе бирә. *Сеп-сей. Сеп-серек.*

**СЕПАРАТИВ** *с.* **1.** [*рус.* сепаративный] Сепаратизм менән һуғарылған. *Сепаратив сығыш.*

**2.** [*рус.* сепаратный] Үҙенә айырым торған, башҡалар менән иҫәпләшмәгән. *Сепаратив килешеү.*

**3.** [*рус.* сепаратистский] Сепаратисҡа, сепаратизмға мөнәсәбәтле. *Сепаратив хәрәкәт.*

**СЕПАРАТИЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Кем йәки нимәнәндер үҙенә башҡа айырылыуға, бүленеүгә булған ынтылыш.

**СЕПАРАТИСТ** [*рус.*] *и.* Сепаратизм яҡлы кеше. *Сепаратистар хәрәкәте.*

**СЕПАРАТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡатнаш, аралаш нәмәләрҙең бер төрлөһөн икенсеһенән айыра торған төрлө аппарат атамаһы. *Магнитлы сепаратор. Һөт сепараторы.* ■ *Ауылды беренсе булып .. сепаратор алды Гәрәй.* Б. Бикбай. *Аҙбарҙарҙың береһендә сепаратор. Унда ауыл ҡатындары һыйырҙарҙың көнө буйы эҫе ҡояш аҫтында йыйған һөттәрен биҙрәләргә бушатып алып киләләр ҙә ҡаймағын айырталар.* Ғ. Хәйри.

**СЕПЕЙ** [1] *и.* Бәләкәй, бала тауыҡ, себеш. *Тауыҡ сепейе. Сепей сығарыу.*

**СЕПЕЙ** [2] *и. диал. кар.* **себешке** [2]. *Аяғына сепей сыҡҡан.*

**СЕПЕЙ** [3] *с. диал. кар.* **бысый** 2. *Сепей күҙ.*

**СЕПЕЙЛӘҮ** [1] *ҡ.* Сепей [1] сығарыу, себешләү. *Тауығы сепейләгән.*

**СЕПЕЙЛӘҮ** [2] *ҡ. диал. кар.* **себешкеләү** [2].

**СЕПЕК** *с. диал. кар.* **бысый** 2. *Күрәк һаҡаллы ҡарт туҡтауһыҙ йәше ағып торған сепек күҙҙәрен һөрттө.* Б. Бикбай.

**СЕПЕЛДӘТЕҮ** *ҡ.* Йыш-йыш йомоу, йомғолау (күҙҙе). *Барған һайын, кипкән япраҡ йөҙлө секретарь, ҡыҫыҡ күҙҙәрен сепелдәтеп яҙа ла ултыра.* Б. Бикбай.

**СЕПЕЛДӘҮ** *ҡ.* Йыш-йыш йомолоу (ғәҙәттә ауырыу күҙгә ҡарата). *Сепелдәп торған күҙ.*

**СЕПРӘК** *и.* **1.** Төрлө маҡсатта ҡулланылған, ғәҙәттә инде файҙаланылған туҡыма киҫәге йәки ҡалдыҡ-боҫтоҡ туҡыма. *Ҡул сепрәге. Сепрәккә төрөү. Сепрәк менән һөртөү.* ■ *Ямал Сәғиҙәнең .. ике беләген дә дымлы сепрәк менән ураны.* М. Тажи. *Әсәйем: — Ямаулыҡ та юҡ, исмаһам,— тип, иҫке һандыҡты асып, ундағы иҫке-моҫко сепрәкте аҡтара.* М. Ғафури. / Бала иҫкеһе. *Бала, бахыр, көн тәүлегенә ҡулға бер эләкмәй, алама сепрәгендә һаҫып ятҡас, иламай нишләһен инде.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *һөйл.* Кейем, ҡаралды. *Өй эсендә ҡулға торлоҡ рәтле сепрәк заты юҡ.* Б. Бикбай. *Жираф кеүек ала-сыбар сепрәккә уранып, йөрөй ошо Ташкурсаҡ ҡыҙ йәмен боҙоп урамдың.* М. Тажи. *[Шәмголовтың] бар яуыҙлыҡ эштәрен кибетендәге сепрәк яба.* Ш. Бабич.

**3.** *с. мәғ.* Ҡалдыҡ-боҫтоҡ туҡыма киҫәгенән эшләнгән йәки тегелгән, һуғылған. *Сепрәк*

*айыу. Сепрәк балаҫ. Сепрәк курсак. Сепрәк токсай.*

♦ **Сепрәккә әйләнеү** бик нык таушалыу, туҙыу. *[Әхәт:] Быйыл ғына сыккан китап, .. сепрәккә әйләнеп бөткән.* Р. Ғабдрахманов. **Сепрәккә ярар ерен калдырмау** бик нык хурлап, кәмләп әрләү. *Беренсе секретарь тағы Мөжипов менән Әхмәҙуллинды сепрәккә ярар ерҙәрен дә калдырмайынса әрләй башланы.* Д. Исламов.

● *Ағас күрке — япрак, әҙәм күрке — сепрәк.* Әйтем.

**СЕПРӘКЛӘНЕҮ** *к.* Нык таушалыу, туҙыу; сепрәккә әйләнеү. *Балаҫ туҙҙы, сепрәкләнеп бөттө.*

**СЕПРӘК-САПРАК** *и. йыйн.* **1.** Төрлө алама сепрәк. *Сепрәк-сапрак ташыған Мирхәйҙәр бабай кунактарҙы күҙәтеп, артынан йөрөнө.* И. Ғнззәтуллин.

**2.** *һөйл.* Алама кейем-һалым. *Инәләр. Инһәләр, өй эсе шундай който, ти, үгеҙ мөгөҙөнә элеп сығырлык сепрәк-сапрак заты юк, ти* (Экиәттән).

**СЕПРӘКСЕ** *и.* Сепрәк-сапрак йыйыусы. *Сепрәксе .. һуғыш тураһындағы имеш-мимеш хәбәрҙәрҙе файҙаланып, ас бала-саға йыйған сепрәк-сапракты .. әжерһеҙ йыя ине.* Х. Мохтар.

**СЕП-СЕП** *окш.* Сейләнеп, йыш-йыш асылып-ябылып торған күҙ хәрәкәтен белдергән һүҙ. *Күҙе сеп-сеп итеп тора.*

**СЕПСИС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Кандың микробтар тарафынан ағыуланыуы сәбәпле көсәйеп киткән ауыр йоғошло ауырыу.

**СЕПТЕРЛӘҮ** *к. кар.* **сылтырау** 2. *Септерләп кенә һыу аға.*

**СЕПТӘ** *и.* Теткән һалабаш йүкәһенән һуғылған эре тукыма (каплау, ябыу, төрөү һ. б. өсөн кулланыла). *Сeптә һуғыу. // Сeптә кап.* ■ *Мин ял көнө .. әсәйемә һалабаш йүкәһенән септә һуғырға ярҙамлашам.* Н. Мусин. *Йорттоң йылыһын ел һурмаһын өсөн тәҙрәләр арыш һаламынан үрелгән септә менән ябылған.* Ғ. Хәйри.

**СЕР** [1] [*ғәр.*] *и.* **1.** Башкалар белергә тейеш булмаған йәшерен мәғлүмәт һ. б. *Хәрби сер. Дәүләт сере. Эс сере. Сер итеп әйтеү. Сер итеп һаклау.* ■ *Сер тормай Бикә һиндә. Бер нәмә ишеттеңме — хәҙер бөтә донъяға сәсәһең.* Ғ. Ғүмәр. *Ниндәй генә серҙәр юк һуң унда [тарихта], киң биттәрен асып караһаң?* Т. Йәнәби. *Граждандарҙың шәхси тормошо, хат яҙышыу, телефон аша һөйләшеү һәм телеграф аша хәбәрләшеү сере закон менән һаклана.* Башкорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. **Сер биреү** йәшерен эште һ. б. кешегә еткереү, серҙе асыу, сисеү. *Кара бул, зәһәр бул дошманға, сер бирмә һыналған дошманға.* Ш. Бабич. / Бер нәмәнең йәшерен, эске асылы. *Уңыштың сере.* ■ *Төлкө капканға якын да килмәне, уратып үтеп китте. Тайморзин бының серенә төшөнә алманы.* М. Тажи. *Фәтхел кайтып бара, аңламай үл серен был эштең.* Р. Ниғмәти.

**2.** Әлегә билдәле булмаған, беленмәгән, асылмаған нәмә. *Космос сере. Тәбиғәт сере. Тормош сере.*

● *Белмәгәнгә һүҙ һөйләмә, серһеҙгә сер һөйләмә.* Мәкәл.

**СЕР** [2] *окш.* Илаулап кыскырған әсе тауышты белдергән һүҙ. *Сер итеү.*

♦ **Себен теймәҫ — сер итер** сак кына тейгәнгә илап, сарбайлап барған кешегә әйтелә.

**СЕРАНӘ** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Серле.

**СЕРБ** *и.* Югославия составына ингән Сербияның төп халкын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (славян телдәренең береһендә һөйләшә). *Серб халкы. Серб катыны. Серб сәнғәте.*

**СЕРБАЛА** *и. диал.* Селбәрә.

**СЕРВАНТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Һауыт-һаба, ашъяулык кеүек нәмәләр куя торған тәпәшәк буфет. *Ғафур Мәҙинә менән икәүләп өҫтәлгә ашъяулык яба, сервантган рюмка, тәрилкә сығарып теҙә.* Ш. Янбаев.

**СЕРВИЗ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Билдәле һандағы кешегә иҫәпләнгән бер комплект һауыт-һаба. *Аш сервизы. Сәй сервизы. Сервиз сынаяғы.* ■ *Тотош быяла сервант эсендә теҙелеп ултырған алтын буталлы сервиз килеп инеү менән Әхмүштең күҙҙәрен сағылдырып ебәрҙе.* Б. Бикбай.

**СЕРГЕ** *и.* Үңлек өҫтөнән эйәр аҫтына һалына торған тышлы кейеҙ. *Аркаһына серге һалғас, тай бик һылыу конанға әйләнгән.* З. Биишева. *Хажиәхмәт ката кейгән аяғын өҙәнгегә тейҙерер-тейҙермәҫтән, биҙәкле сергегә эйәрләнгән атына яйлы ғына һикереп менде лә юл башлап алға сыкты.* Я. Хамматов.

♦ **Серге кағыу** *этн.* кунактан һуң калған әсемлекте әсеп бөтөү.

**СЕРГЕТЫШ** *и.* Серге өҫтөнән көпләгән биҙәкле күн йәки буҫтау. *Кыҙҙар ҙа ат эйәрләгән, эйәр аҫтына .. биҙәкле сергетыш һалған.* Ш. Шәһәр. *Атакай ҙа атың күкме ни, сергетышкайҙарың сукмы ни?* (Сеңләүҙән).

**СЕРҘӘШ** *и.* Сер [1] (1 мәғ.) уртаклашыр якын кеше, ышаныслы дуҫ. *Унда мин ыҫпай, матур һәм йәш инем, баш инем һәм тәңрегә серҙәш инем.* Ш. Бабич. *Серҙәрем күп, серҙәшем юк, эстәрем һағыш кына* (Халык йырынан).

**СЕРЕК** I *с.* **1.** Һыу, һауа тәьҫирендә оҙак булыу сәбәпле тәүге сифатын, ныклығын юғалтып боҙолған, таркалған. *Серек ағас. Серек аркан. Серек алма. Серек бәрәңге.* ■ *Уңда ла, һулда ла мүкләнгән, яртылаш серек, кәкре-бөкрө ағастар ята.* Я. Хамматов. *Мулла серек карағай өйөнөң төпкө мөйөшөндә таяғын янына һөйәп күй[ҙы].* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *кусм.* Тормоштан ситкә тайпылған; хата, яңылыш. *Беҙҙә әле серек акыл һатып йөрөгән Эршиттәрҙең булғанын йәшереп булмай.* Ғ. Сәләм. *Иҫкелектең серек мираҫтары, наҙанлыктар беҙгә тиң түгел!* Ғ. Мәсғүт.

II *и.* Һыу, һауа тәьҫирендә оҙак булып, боҙолған, таркалған нәмә. *Алманың сереге.* ■ *[Келәт бүрәнәләренә] сак кына кағылһаң, һап-һары сереге койола башлай.* Б. Бикбай.

♦ **Серек ауырыуы** бал кортоноң балаһын серетә торған йоғошло ауырыу. **Серек баш** тнҙ онотоусаи, хәтерһеҙ, кешегә карата әйтелә. **Тамыр сереге** *кар.* **тамыр.**

**СЕРЕЛДӘҮ** *к. кар.* **сырылдау** 1.

**СЕРЕМ** *и.* Ҡыҫҡа ваҡытлы ярым йоҡоло хәл. *Серемгә талыу.* ■ *Шәрифә әбей диванда ойоҡ бәйләп ултырған еренән серемгә китеп бара ине.* Ф. Иҫәнғолов. *Керпектәренә саҡ ҡына серем ҡундымы, уйҙар килә лә йоҡоно осора.* Я. Вәлиев.

□ **Серем итеү** бер аҙ ойҡлап алыу. *«Алмашлап серем итербеҙ, ныгытып йоҡларға ярамай»,— тине ҡусер.* Я. Хамматов.

**СЕРЕМТӘ** *и.* **1.** Тупраҡтың үҙендә үлән, хайуан ҡалдыҡтарынан барлыҡҡа килгән ҡатлам. *Серемтәгә бай ҡара тупраҡ.*

**2.** *кар.* **серетмә** 1.

**СЕРЕНА́ДА** [*рус.* ‹ *ит.*] *и.* **1.** Урта быуаттағы Италия менән Испанияла: һөйгән ҡыҙға тойғоно асып, мандолина, гитара һ. б. музыка ҡоралына ҡушылып йырланған йыр.

**2.** Инструменталь ансамбль өсөн яҙылған сюита тибындағы музыкаль әҫәр.

**СЕРЕТЕҮ** *к.* **1.** Һыу, һауа тәьҫирендә оҙаҡ тотоп боҙоу. *Бесәнде серетеү. Балыҡты серетеү.* ■ *[Әпәс:] Ә һин, Шөкри, дүрт-биш биҙрә ранетканы серетеп түктең — мал кәҙерен белмәйһең һин.* М. Садыҡова. *Арбаны .. серетеп яҡтырырға ярамай, фермаға бесән ташый торған ридуанға алмаштырырға кәрәк.* Б. Бикбай.

**2.** *күсм.* Ауыр, ғазаплы шарттарҙа тотоу, яфалау. *Ул һөйләгәндә йәндәрең рәхәтләнеп тора, ләкин ундай һүҙҙәр өсөн ул сакта башыңды төрмәлә серетәләр ине.* Б. Мирзанов. *Етерлек йырттылар йөҙөңдө, серетеләр золматта үҙеңде.* Ш. Бабич.

**3.** *күсм.* Байлыҡҡа күмеү, ныҡ байытыу. *[Егет — әсәһенә:] Күргән бер төшөң раҫ булһа, һин беҙҙе күптән байытып, серетеп бөтөр инең.* Т. Йәнәби.

◆ **Икмәк серетеү** *кар.* **икмәк. Мейе серетеү** *кар.* **мейе.**

**СЕРЕТКЕ** *и.* Баҫҡанда себеше сыҡмай боҙолған йомортҡа.— *Ул [өйрәк] ысынлап та бәпкә сығарырға әҙерләнһә, йомортҡалары һыуынып ҙа серетке булыр,— тинем.* С. Агиш.

**СЕРЕТМӘ** *и.* **1.** Серегән тиреҫ, тиҙәк. *Баҫыуға серетмә сығарыу эше ваҡытында башҡарылды.*

**2.** *кар.* **серемтә** 1.

**СЕРЕҮ** *к.* **1.** Һыу, һауа тәьҫирендә оҙаҡ булып, боҙолоу, тарҡалыу. *Серегән ағас. Серегән бесән. Серегән картуф. Серегән теш.* ■ *Ғаббас мулланың бер мөйөшө сереп ергә һеңгән мәҙрәсәһе яңы мәктәп өсөн яраҡһыҙ булып сыҡты.* З. Биишева. *[Сурағол:] Ҡабырғаһын ҡорт йырып, ҡара күҙен ҡарға соҡоп, иңбаштарын иңкеш һурып, ил ярлыһы өсөн көрәшкән ир башҡорттар ҡайҙа сереп ҡалмаған.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *күсм.* Ауыр шарттарҙа йәшәү, көн итеү. *[Аҡбулат] дүрт йыл буйы .. окопта серене, бахыр.* З. Биишева. / Рухи яҡтан тарҡалыу. *Баҙар королдәре! Шарлатандар! Сереп бөткән һыра ҡорттары!.. Ишетәһегеҙме?! Һеҙгә ҡабаҡ дуҫы йырсы малай булып ҡала алмай.* С. Агиш.

**3.** *күсм.* Байыуҙың сигенә сығыу; ныҡ байыу. *Серегән бай.* ■ *Ағалы-энеленең береһе .. байып, сереп ултыра, ти* (Әкиәттән).

**4.** *күсм.* Отолоп, уйынды сығыу. *Ҡаршы яҡтан берәү туп менән бәреп индерһә, йүгергән кеше серей.*

◆ **Ир муйынында ҡыл еп серемәҫ** ир өҫтөндәге бурыс юғалмаҫ, тигән мәғәнәлә әйтелә. **Әллә ҡасан һөйәге серегән** күптән үлеп, онотолоп бөткән.

● *Балыҡ башынан серей.* Мәҡәл.

**СЕРЖА́НТ** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Армия һәм милициялағы кесе командирҙар составына бирелгән дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше. *Кесе сержант. Өлкән сержант. Сержант званиеһы.*

**СЕ́РИЯ** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* **1.** Уртаҡ билдә һәм сифаты булған нәмәләр төркөмө. *Башҡорт фольклорында .. Совет Конституцияһы тураһындағы йырҙар серияһы [барлыҡҡа килә].* К. Мәргән. / Бер-бер артлы килгән оҡшаш эш-хәрәкәт теҙеме. *Күнекмәләр серияһы.*

**2.** *тех.* Бер стандарт буйынса эшләнгән изделиелар, деталдәр төрө. *Машиналар серияһы.*

**3.** Ҡиммәтле ҡағыҙҙарҙың (аҡсаның, облигацияның һ. б.) һан йәки хәреф менән билдәләнгән разряды, категорияһы. *Аҡсаның серияһы һәм номеры.*

**4.** Ҙур фильмдың айырым күрһәтелгән бер өлөшө. *Фильмдың беренсе серияһы.*

**СЕРИЯЛАП** *р.* **1.** Билдәле стандарт буйынса сериялар менән. *Сериялап деталдәр сығарыу. Сериялап эшләү.*

**2.** Сериялы (2 мәғ.) итеп. *Сериялап эшләнгән фильм. Сериялап фильм сығарыу.*

**СЕРИЯЛЫ** *с.* **1.** Билдәле стандарт буйынса сериялап эшләнгән. *Сериялы сығарылыш. Сериялы станоктар.*

**2.** Күпмелер сериянан (4 мәғ.) торған. *Ике сериялы нәфис фильм. Күп сериялы фильм.*

**СЕРКЕЛДӘҮ** *к. кар.* **сырҡылдау.** *Сәпсек серкелдәй.*

**СЕРКЕТЕҮ** *к.* Юҡҡа сығарыу, бөтөрөү.— *Ә һин, Ямал еңгә, Йомағол ағайҙы ысынлап та партияға яраҡһыҙ тип уйлайһыңмы, әллә уны халыҡ алдында серкетергә ниәт тотоп әйтәһеңме?* М. Тажи.

**СЕРКЕҮ** [1] *к.* Юҡҡа сығыу, бөтөү. *Эсе уткәшеп йөрөй торғас, һыйыр серкеп ҡуйҙы.* Ғ. Ишбулатов.

**СЕРКЕҮ** [2] *и.* Оятсылыҡ, хурлыҡ. *Биткә серкеү килтереү. Серкеү һалыу.*

**СЕРК-СЕРК** *оҡш.* Төрлө ваҡ ҡош һ. б. тауышын белдергән һүҙ. *Серк-серк итеү. Серк-серк килеү.* ■ *Ана, бейектә күгәрсендәр оса, ана, серк-серк килеп сыпсыҡтар ҡыуаныша.* Д. Исламов.

**СЕРКӘТӘҮ** *с. диал.* Сирләшкә. *Серкәтәү бала.*

**СЕРКӘШ** [*фарс.*] *и.* Башҡорттоң фарсы араһындағы атамаһы.

**СЕРКӘШЕҮ** *к. диал.* Серәнеү. *Хәйҙәр .. бөтә ихтыярын туплап, аҙғын теләктәрен еңеп, серкәшеп уҡырға тотона.* Ф. Иҫәнғолов.

**СЕРЛЕ** *с.* **1.** Башҡаларға белдерергә ярамаған, йәшерен. *Серле хәбәр. Серле ҡағыҙ.*

**2.** Йәшерен мәғәнәле, асылы билдәһеҙ. *Серле ҡараш. Серле мөнәсәбәт. Серле рәүештә. Серле*

*итеп. // Серле йылмайыу.* ■ *Фатима үҙ алдашыуынан үҙе оялып, усак алдына әйләнде, ә Ғариф карт серле тамак кырып куйҙы.* Б. Бикбай. *Ул сак миңә бары ла серле ине: алтын кырҙар, күлдәр камышы.* М. Харис.

**3.** *кар.* **тылсымлы.** *Тирә-якты серле моң баҫты.* З. Биишева. *Карт капыл үҙенең серле таягын болгап куйған, шунда бөтә йыландарҙы ут камап алған* (Әкиәттән).

**СЕРЛЕЛЕК** *и.* Ниндәйҙер билдәһеҙ, аңлашылмаған һәм серле нәмә. *Һөйләшкәндәрҙең араһына инерлек русса белмәгән Рәхимәнең был серлелектән эсе янды.* Һ. Дәүләтшина.

**СЕРЛӘШЕҮ** *к.* Ихласлык менән күңел беркетеп, серле-серһеҙ хәбәр һөйәшеү. *[Аллабирҙе:] Минең серләшерҙәй кешем бер һин генә калдың инде, кәйнәм.* А. Мөбәрәков. *Йөрәктәр төнөн серләшә, аяк тауышы тынғас.* М. Кәрим.

**СЕРНӘШКЕ** *с. диал.* Бәйләнсек. *Сернәшке кеше.*

**СЕРОВОДОРО́Д** [*рус.*] *и.* Көкөртлө водород, серек йомортка еҫенә окшаш еҫле төҫһеҙ газ. *Каты сероводород. Сероводород кислотаһы. Сероводород һыуы.* ■ *Боҙ аҫтындағы үҫемлектәр сереп, сероводород сығара һәм балыктарҙы тонсоктора.* «Совет Башкортостаны», 1971, 23 ғинуар.

**СЕРОВОДОРОДЛЫ** *с.* Составында көкөртлө водород булған. *Янғантау итәгендә Йөрүҙән яры буйлап сероводородлы шишмәләр урғылып сыға.* М. Хисмәтов.

**СЕРПАНТИ́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Карнавал, маскарад, бал вакытында кешеләр өҫтөнә ырғытыла торған төрлө төҫтәге тар кағыҙ таҫма. *Антракт вакытында конфетти һибештәре, серпантин солғаныштары, почта уйындары буласак.* С. Агиш.

**СЕР-СЕР** *окш.* **1.** Вак кош, сиңерткә кеүек нәмә тауышын белдергән һүҙ. *Сер-сер итеү.*

**2.** Кабат-кабат сер [2] иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сер-сер килеү.*

**СЕРТ** *окш.* Теш араһынан төкөргәндә, һағыҙ сәйнәгәндә, баткак кискәндә һ. б. сыккан нәҙек тауышты белдергән һүҙ. *Серт итеү. Серт иттереү.* ■ *Фёдор, бер ҙә иҫе китмәгән кешеләй, серт итеп төкөрөп куйҙы.* В. Исхаков.

**СЕРТЕЛДӘТЕҮ** *к.* Серт-серт иттереү. *Сертелдәтеп баткак кисеү.* ■ *Әллә ниндәй был Сафа .. Сыйылдата көсөктө, күтәрә лә әйәген, сертелдәтеп төкөрә.* К. Кинйәбулатова.

**СЕРТЕЛДӘҮ** *к.* Серт-серт итеү. *Баткак баҫкан һайын сертелдәй.*

**СЕРТЛӘТЕҮ** *к.* Серт иттереү. *Сертләтеп төкөрөү.*

**СЕРТЛӘҮ** *к.* Серт итеү. *Быҫрак һыу аяк бармактары араһынан сертләп сыға ла биткә сәсрәй.* Р. Ғабдрахманов.

**СЕРТ-СЕРТ, серт тә серт** *окш.* Кабат-кабат серт иткән тауышты белдергән һүҙ. *Серт-серт көнбағыш ярыу.* ■ *Каҙактар .. аяктарын бөкләп ерҙә ултыралар, һирәк-һаяк кына бер-береһенә өндәшеп, теш араларынан серт-серт төкөрәләр.* Ғ. Ғүмәр. *«Һаумыһығыҙ»,— тине йәшерәк катын, ауыҙындағы һағыҙын серт-серт сәйнәп.* М. Тажи.

**СЕРӘ** *р. диал.* Нык, үтә. *Серә матур.* ■ *Хәби бай упайған күҙҙәрен серә яндырып, Сурағолға әйләнде.* Т. Хәйбуллин.

**СЕРӘЙ** *и.* Һаҙандар ғаиләһенә караған, кабырғаһында тимгел-тимгел таптары булған, кыҙыл канатлы вак йылға, күл балығы; гальян.

**СЕРӘЙЕҮ** *к.* Мыҙлап, нык текәлеү (күҙгә карата). *Серәйеп карау.*

**СЕРӘЙЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **серәйеү.** *Серәйешеп карап тороу.*

**СЕРӘКӘЙ** *и.* Ике тар канатлы, оҙон аяклы, нәҙек кәүҙәле кан һурғыс бөжәк. *Тапма серәкәйе.* ■ *Атайым серәкәйҙәргә каршы һәр вакыт кәнәфер майы һөртә.* Д. Юлтый. *Серәкәй бөтөп, тай-тулак тынысланғас, аттар һәүетемсә генә утларға керешә.* К. Кинйәбулатова.

**СЕРӘНЕҮ** *к.* Бөтә көстө һалып тырышыу; көсөргәнеү. *Ат бик йонсо[ған], йөктө серәнеп сак тарта.* Ғ. Ибраһимов. *[Миңһылыу:] Күпме серәнһәк тә, беҙ артманык, ә Исхак калынайҙы.* К. Кинйәбулатова.

**СЕРӘНЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **серәнеү.** *Парлап-парлап еккән көслө аттар серәнешеп һабан тарталар.* Х. Ғәбитов.

**СЕРӘҮ** *к.* Нык көс һалыу.— *Таймаҫка тырышып, аякты серәп баҫа торғас, катыу сыкты.* К. Кинйәбулатова.

**СЕРӘШ** *с.* Һүҙендә, эшендә һ. б. нык торған. *Серәш кеше. // Аякты серәш терәп тороу.* ■ *[Малай] нык лы, серәш баҫып тора.* Ә. Ихсан.

◆ **Серәш уйнау** кем еңерҙән текләшеп уйнау.

**СЕРӘШЕҮ** *к.* **1.** Көс һалып тырышыу; нықышыу. *Йәйәргә серәшеү.* ■ *[Яхья:] Егеттәр, ул тиклем үк серәшмәйек. Йөктәрҙе бушатып, күмәкләшеп берәм-берәм [тауға] мендерәйек.* Н. Мусин. *Үтеп инмәк булып сафка, аҙмы серәште һуң ситтәр!?* Х. Назаров. *Йәнем бирмәй серәштем, үлем менән көрәштем.* «Урал батыр». / Нык каршылашыу. *Бармай серәшеү. Риза булмай серәшеп тороу.* ■ *Иҫкелек ул күпме генә серәшмәһен, барыбер еңеп барыусы яңылык алдында көсһеҙ.* Ғ. Хөсәйенов. *Яһак бирмәй серәшкән.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым»..

**2.** *диал.* Серәйеү.

**СЕРӘШКЕР** *с. кар.* **серәш.** *Серәшкер кеше.*

**СЕСКӘ** *с. диал. кар.* **нескә** 1. *Сескә билле.*

**СЕСКӘРЕҮ** *к. диал. кар.* **нескәреү** 1.

**СЕ́ССИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Төрлө һайланма һәм коллегиаль ойошмаларҙың вакыт-вакыт була торған ултырышы һәм шул ултырыш барған вакыт араһы. *Күсмә сессия. Сираттағы сессия. Сираттан тыш сессия. СССР Верховный советы сессияһы. Россия фәндәр академияһының сессияһы.*

**2.** Юғары һәм махсус урта укыу йорттарындағы вакыт-вакыт була торған имтихан һәм шуны тапшырыу осоро. *Кышкы сессия.* ■ *[Гөлсәсәк:] Мин ауыл хужалығы институтында ситтән тороп укыйым бит. Бер айға йәйге сессияға китер сак етте.* Д. Исламов.

**СЕСТРА́** [*рус.*] *и.* Урта медицина хеҙмәткәре; медсестра. *Сестра һаташып яткан яралы эргәһенә ашыкты.* Д. Исламов. *Минең алға карт бер сестра килде.— Яраң кайҙа? — тип минең кулды сисеп карай башланы.* Д. Юлтый.

**СЕТЕР** *окш.* Сатнап, сайрап киткәндәге кеүек нәҙек тауышты белдергән һүҙ. *Сетер итеү.*

**СЕТЕРЕК(ЛЕ)** *с. диал. кар.* **ҡатмарлы**[2] 4. *Сетерекле мөнәсәбәт. Сетерекле һорау.*

**СЕТЕРЛӘТЕҮ** *ҡ.* Сетер-сетер иттереү, сетер-сетер килтереү. *Кинәт кенә сетерләтеп йәшен атты, ерҙе һелкетеп күк күкрәне.* Ф. Әсәнов.

**СЕТЕРЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Сетер-сетер итеү, сетер-сетер килеү; сытырлау. *Сетерләп яның китеү.*

**2.** *кусм. диал.* Тәтелдәү.— *Уны [ҡәләмде] миңә әсәйем алып ҡайтты. Ғәләү муллаға урак урган аксаһына,— тип сетерләне Барый, ҡәләмен артына йәшереп.* Р. Ғабдрахманов.

**СЕТЕР-СЕТЕР** *окш.* Ҡабат-ҡабат сетер иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сетер-сетер итеү. Сетер-сетер килеү.*

**СЕТКА** [*рус.*] *и.* **1.** Төрлө маҡсатта ҡулланыу өсөн ептән, бауҙан, сымдан һ. б. сатрашлап үргән нәмә. *Волейбол сеткаһы. Карауат сеткаһы.*

**2.** *һөйл.* Аҙыҡ-түлек, ваҡ-төйәк нәмә һалып йөрөтөр өсөн ептән, бауҙан һ. б. үрелгән сумка. *Фәхри сетканан оҙон аркан килтереп сығарҙы.* А. Ғирфанов.

**СЕҮ** *өнд.* Тауышланмаҫҡа йәки иламаҫҡа ҡушып әйтелә. *Малайҙарға ололар һөйләшергә ирек бирмәне: — Сеүегеҙ! Нимә бар һеҙгә бында! Китегеҙ бынан, аяҡ аҫтында уралып йөрөмәгеҙ.* Я. Хамматов. *Сеү, балам! Сеү, илама! Күп илауҙа файҙа юк.* Т. Йәнәби. / Һағайырға өндәгәндә, һағайғанда әйтелә. *Сеү, ана арыраҡ, бер землянка эргәһендә, оҙон буйлы һалдат һыны күренә түгелме һуң?* Д. Исламов. *Сеү! Ҡараңғы күҙгә төндә кемдер миңә ишек ҡаға.* М. Кәрим.

**СЕҮЕЙ** *өнд.* Һыйыр малына һыу эсергәндә әйтелә торған һүҙ.

**СЕҮӘТӘ** *и.* Ҙур булмаған сөм һауыт. *Ағас сеүәтә. Тимер сеүәтә.* ■ *[Гөлгөнәгә] алюмин сеүәтәгә оло сүмес менән тары бутҡаһы һалып бирҙеләр.* Ш. Янбаев. *[Ҡыҙ] таҙ алдына биҙәкле сеүәтә менән ҡаймаҡ, күпереп бешкән сөрәк килтереп ҡуйҙы* (Әкиәттән). **Баҙыян сеүәтә** текә тирәсле, сөм итеп биҙәкләп эшләнгән бәләкәй ағас һауыт.

◆ **Сеүәтә йыуыу** *кар.* **йыуыу.**

**СИБЕГЕҮ** (сибек*⁄*) *ҡ.* Сибеккә (1 мәғ.) әйләнеү; сибекләнеү. *Ауырығандан һуң сибегеп, ашарға насарланып ҡалды.*

**СИБЕК** *с.* **1.** Ашауға насар, әҙ ашаусан. *Ашағанын күрһәгеҙ ине һеҙ ул сибектең .. Бөтә ашағанын бергә йыйһаң, бер сәпсек тә туймаҫ.* Р. Ғабдрахманов.

**2.** Ябыҡ, хәлһеҙ, кәүҙәгә бәләкәй; кәгез. *Сибек кеше.* ■ *Сибек кенә кәүҙәле, уйсан карашлы малай ул [Василий]. Йәштәш булһалар ҙа Айраттан буйға нык ҡайтыш.* Х. Зарипов. *Ҡыш көнө аҙыҡ, бесән аҙыраҡ булып, һөтө юҡлыктан колоно сибегерәк.* Н. Ҡәрип. *Аҡназар һунарсы урта буйлы, сибек кенә бер бөкрәйгән ҡарт булып сыҡты.* К. Даян. / Насар үҫкән, имгәнгән; зәғиф (үҫемлеккә ҡарата). *Ҡарағайҙар .. бер иш түгел. Мөһабәт олондар араһында сибегерәктәре лә осрай.* Ғ. Вәлиев.

**СИБЕКЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Сибеккә (2 мәғ.) әйләнеү; сибегеү. *Ашауға сибекләнеү.*

**2.** Ябыҡ, хәлһеҙ, бәләкәй кәүҙәлегә әйләнеү; кәгезләнеү. / Насар үҫеү, имгәнеү; зәғифләнеү (үҫемлеккә ҡарата). *Йылдарҙың яҡшы килеүенә ҡарамаҫтан, бындағы ашлыктар ниңә былай, аслыкта үҫкән етем балалар кеүек, сибекләнеп ҡалған икән?* М. Ғафури.

**СИБӘР** *с.* Йөҙө һөйкөмлө, матур, һылыу (кешегә ҡарата). *Сибәр ҡыҙ.* ■ *Заятүләк ҡыҙҙың сәсенән тотоп ала. Ҡыҙ ҡурҡып китә, әйләнеп ҡараһа, сибәр бер егет тора.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». / Һоҡланғыс, күркәм, матур (йән эйәһенә, үҫемлеккә ҡарата). *Йәшел аҡланда елдән сайкала ҡайын һәм шыршы. Ере — гөлбиҙәр, ҡайыны — сибәр, шыршыһы ҡупшы.* Я. Ҡолмой. *Сибәр генә сибәр йәшел өйрәк йөҙөпкәй ҙә йөрөй буҙ булып* (Халыҡ йырынан).

● *Сибәрҙең йөҙө уртаҡ, оҫтаның ҡулы уртаҡ.* Мәҡәл.

**СИБӘРЛЕК** *и.* Күңел төшөрлөк тышҡы киәфәт; матурлыҡ. *Барһынһылыу .. сибәрлегең артһын, һылыу, ҡара ҡашың, зифа буйың һөйгәнеңә яҙһын, һылыу.* «Алпамыша».

**СИБӘРЛӘНЕҮ** *ҡ.* Сибәргә (1 мәғ.) әйләнеү; сибәр булыу.— *Ә инде ул ҡыҙ, үҫеп буйға еткәс, бигерәк сибәрләнгән, бигерәк матурланған.* И. Ғиззәтуллин.

**СИВУЧ** [*рус.*] *и.* Ҡолаҡлы тюлендәр ғаиләһенә ҡараған һөтимәр диңгеҙ хайуаны.

**СИГ** [*рус.*] *и. кар.* **алабалыҡ.**

**СИГА́РА** [*рус.* ⟨ *фр.* ⟨ *исп.*] *и.* Тартыр өсөн тығыҙ итеп ураған тәмәке япрағы. *[Һалдаттар] елкәләрендәге токтарына киммәтле папиростар, сигаралар тултыра.* Д. Юлтый.

**СИГАРЕТ** [*рус.* сигарета ⟨ *фр.*] *и.* Мөштөкһөҙ тартыла торған, йоҡа ҡағыҙға тығыҙлап уралған тәмәке. *Фильтрлы сигарет.* ■ *Талха .. бөхтә кейенә, киммәтле папиростар, сит ил сигареттары көйрәтә.* В. Исхаҡов. *Самат төпсөккә генә ҡалып, бармаҡтарын бешерә башлаған сигаретын асыу менән ергә батырҙы ла икенсеһен ҡабыҙҙы.* Д. Исламов.

**СИГЕЛЕҮ**[1] *ҡ. төш. кар.* **сигеү**[1]. *Позициянан артҡа сигелде.*

**СИГЕЛЕҮ**[2] *ҡ. төш. кар.* **сигеү**[2]. *Күпме аҙап сигелде.*

**СИГЕЛЕҮ**[3] *ҡ. төш. кар.* **сигеү**[3]. *Сигелгән таҡыя. Сигелгән яға.*

**СИГЕНДЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Торған еренән артҡа хәрәкәт иттереү; сиктереү. *Артҡа сигендереү.*

**2.** Һөжүм итеп, ҡыҫырыҡлап, биләгән еренән кире хәрәкәт иттереү. *Дошманды сигендереү.*

**3.** *кусм.* Элек булған уй-фекерҙән кире ҡайтырға мәжбүр итеү. *Уйҙан сигендереү.*

**СИГЕНЕҮ** *ҡ.* **1.** Торған ерҙән артҡа хәрәкәт итеү, артҡа китеү; сигеү. *Артҡа сигенеү.* ■ *Ат һуҡкан ыңғайға кире сигенде.* Д. Юлтый. *«Һуңлағанбыҙ»—тине, уҙе кинәт сигенеп китте, артҡа эткәндәй.* Ғ. Сәләм.

**2.** Ҡыҫымға сыҙамай, биләгән ерҙе ташлап, киреғә хәрәкәт итеү; сигеү. *Ҡыҙыл Армия 1919 йыл башында һөжүмгә күсә. Аҡ бандалар сигенә.* И. Ниғмәтуллин. *Сигенеүҙе белмә, ҡурҡыуҙы белмә, дошмандың һис бер еңеүен күрмә.* М. Хәй.

**3.** *кусм.* Кире йүнәлештә хәрәкәт итеү; кире

ҡайтыу. *Диңгеҙ сигенгәс, был урындар ҡоро ергә әүерелгән.* Д. Бураҡаев. *[Тулҡын] берсә Ғилман менән Бураншаны бөтөнләй ҡүмеп киткән, берсә үкерә-үкерә кире сигенгән.* З. Биишева.

**4.** *күсм.* Ҡуйған уй-фекерҙән кире ҡайтыу; ҡайтауыллау. *[Зөлхизә] ике уйлау, ике һөйләү тигәнде белмәҫ .. үҙе кәрәк тапҡан эш өсөн үҙен һәләк итер, әммә сигенмәҫ.* З. Биишева. *Һис бер кире сигенеп, һатыулашып тормаҫтан: — Ярай! — тине Әмирханов.* С. Агиш.

**СИГЕРЕҮ** *к.* **1.** Күпмелер күләмде, дәүмәлде кире ҡайтарып алыу, нәмәне шул иҫәпкә кәметеү. *Һауыттың ауырлығын сигереп, һыуҙың ауырлығын беләләр.* З. Байбурин. *[Ҡунаҡбаев:] Һеҙ шул тиклем ҙур планды тултырабыҙ тип, партияны алдайһығыҙ. Улай алдашмайыҡ, күпме көс етер, бирәйек. Ә ҡалғанын сигереүҙе һорарға кәрәк, партия беҙҙең үҙебеҙҙеке бит.* Б. Ишемғол.

**2.** *ҡар.* сигендереү 1. *Атты артҡа сигереү.*

**СИГЕҮ** [1] (сик*ә*) *к.* **1.** Торған ерҙән артҡа хәрәкәт итеү; сигенеү. *Кире сигеү.* ■ *Мин ҡапыл туҡта[ным], бер-ике аҙым артҡа сиктем.* Д. Юлтый. *Түрәбай аҡрын ғына ҡапҡаға барғанда, урамда йоҡлап ятҡан алабай абалап өрә башлағас, кире сикте.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Ҡыҫымға сыҙамай, биләгән ерҙе ташлап, кирегә хәрәкәт итеү; сигенеү. *Улым, ныҡ бул, батыр булып көрәш! Бер аҙым да сикмә артыңа.* Я. Ҡолмой.

**3.** *күсм.* Кире йүнәлештә хәрәкәт итеү; кире ҡайтыу. *Менгән һайын офоҡ артҡа сикте, яҡыная барҙым ҡояшҡа.* М. Кәрим.

**4.** *күсм.* Уйлаған уй-фекерҙән ҡайтыу, ҡайтауыллау. *Уйынан сиккән.*

**СИГЕҮ** [2] (сик*ә*) *к.* Берәй эш-хәлде баштан үткәреү; кисереү. *Ғәм сигеү. Рәхәт сигеү. Михнәт сигеү. Хәсрәт сигеү. Яфа сигеү.* ■ *[Рәхим:] Ҡарт башым менән бөкрәйеп, аҙап сигеп, һаҙлыҡҡа бата-бата бесән саптым.* Ш. Шәһәр. *Ата менән әсә ыҙа сиккән күрмәйенсә тормош яҡтыһын.* С. Кулибай.

**СИГЕҮ** [3] (сик*ә*) *к.* Кизе менән биҙәк төшөрөп тегеү. *Ҡульяулыҡ сигеү. Салып сигеү. Йүрмәп сигеү. Күпертеп сигеү. Сиккән күлдәк.* ■ *[Маһира:] Кемгә шулай сүпләп-сүпләп ҡульяулыҡ сигәһең?* Х. Ғиләжев. *Кис ултырып ҡыҙҙар сигеү сигә, биҙәктәргә ялған биҙәкте.* М. Кәрим.

**СИГЕҮ** [4] *и.* Кизе менән тегеп төшөрөлгән биҙәк. *Өҫтәлгә ҡуйылған ҡул машинаһы янында Маһинур сигеү сигеп ултыра.* Р. Ниғмәти. *Сигеү..— ул үҙе бер донъя: тик беҙҙең халыҡ ҡулланған сигеү ысулдары ғына егерменән ашыуыраҡ.* Н. Бикбулатов.

**СИГЕҮЛЕ** *с.* Сигеп биҙәк төшөрөлгән. *Сигеүле шаршау. Сигеүле ҡульяулыҡ.* ■ *Бер яҡ стенала йоҡо бүлмәһенә инә торған ишек, уға сигеүле ҡорған ҡоролған.* Р. Ниғмәти. *Маянһылыу .. түшенән Ҡуҙыйкүрпәскә тип әҙерләнгән сигеүле аҡ ҡульяулығын алды, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**СИГЕҮСЕ** *и.* Сигеү [4] сиккән кеше.

**СИГНАЛ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Ниндәйҙер хәбәр, бойороҡ, команда һ. б. тапшырыу өсөн ҡулланылған шартлы билдә. *Механик сигнал. Иҫкәртеү сигналы. Йылылыҡ сигналы. Тауыш сигналы. Юл сигналдары. Яҡтылыҡ сигналы. Сигнал биреү.* ■ *Зәңгәр күктә йәшел ракета күтәрелде: тантананы башлау өсөн сигнал ине был.* Ә. Ихсан. *Беҙ, һөжүмгә сигнал көтөп, ҡарлы окоп эсенә .. яттыҡ.* Б. Днм.

**2.** *күсм.* Хуп күрелмәгән ниндәйҙер эш-хәл тураһында алынған иҫкәртеү хәбәре. *Көтмәгәндә беҙгә комиссия килеп төштө. Уның председателе: — Өҫтөгөҙҙән сигнал! Тикшерәбеҙ! — тип ҡурҡытып та ҡуйҙы.* Ғ. Әхмәтшин.

**3.** *махс.* Нимәнеңдер булыуын, эшләүен күрһәткән билге һәм уның берәй приборҙа йәки организмда сағылған яуап реакцияһы. *Организмдың сигнал ҡабул итеү һәләте.*

◆ **Сигнал экземпляры** баҫманың типографиянан нәшриәткә ҡултамға ҡуйыу өсөн килеп, тиражды баҫырға әҙерләүгә һәм сығарыуға хоҡуҡ бирә торған тәүге әҙер экземпляры.

**СИГНАЛИЗА́ТОР** [*рус.*] *и.* Сигнал бирә торған прибор йәки уның сигнал биргән бер өлөшө. *Автоматик сигнализатор. Янғын сигнализаторы.*

**СИГНАЛИЗА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* **1.** Ҡулланылған сигналдар системаһы. *Диңгеҙ сигнализацияһы. Автоматик сигнализация. Хәрби сигнализация. Тауыш сигнализацияһы. Тимер юл сигнализацияһы. Янғын сигнализацияһы.*

**2.** Сигнал бирә торған ҡорамал, йайланма. *Сигнализация ҡуйыу. Сигнализация эшләмәй.*

**СИГНАЛСЫ** *и.* Сигнал (1 мәғ.) биреүсе. *Отбой сигналының тауышы тайғаға, сопкаларға барып бәрелеп сигналсыға кире ҡайтты.* Б. Дим. *Иң алда, барабансы янында килгән сигналсы шундай дәртле, серле итеп сигнал ҡысҡырта.* З. Биишева.

**СИГӘ** [1] *и.* **1.** Ике тимерҙе ҡуша беркетә торған сөй. *Сигә һуғыу.*

**2.** Ике нәмәне үтә тишеп беркетә торған сөй йәки бау. *Күгән тимерен ишеккә сигә менән ныҡыталар. Тирмә уғын сигә менән беркетеү.*

**3.** *диал. ҡар.* **оңғо** [1].

**СИГӘ** [2] *и.* Ашыҡтың [1] (2 мәғ.) һул яҡ ҡабырғаһы.

**СИГӘЛЕ** *с.* Сигә [1] (1 мәғ.) һуғылған. *Өс башлы дейеүҙең ҡатыны ҡырҡ сигәле ҡаҙанда ҡырҡ баш мал итен бешереп тора, ти* (Әкиәттән).

**СИГӘЛӘҮ** *к.* **1.** Ике тимерҙе үтә тишеп, сөй менән ҡуша беркетеү. *Суместең тотҡаһын сигәләп ныҡытыу.* ■ *Хәмди еңгәм .. табамдың бер яҡ ситен китеп алып килеп бирҙе. Уныһын үҙем унан-бынан ғына ҡалай менән сигәләп [алдым].* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Ике нәмәне үтә тишеп сөй йәки бау менән ҡуша ныҡытыу. *Ишек күгәнен сигә менән сигәләү.*

**3.** Бал менән тулған күҙәнәкте аҡ балауыҙ менән һылау (бал ҡортона ҡарата).

**СИҒАН** *и.* Донъяның төрлө илдәрендә күсмә йәки ярым күсмә хәлдә төркөм-төркөм булып йәшәгән һинд сығышлы халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе. *Сиған халҡы. Сиған ҡатыны. Сиған теле. Сиған бейеүе.* ■ *Сиғандар Үҙәште буйында туҡтап, аттарын туғарҙы.* Ж. Кейекбаев.

**СИҘӘМ** *и.* Бер ҙә эшкәртелмәгән, һөрөлмәгән үләнле ер. *Сиҙәмде үҙләштереү. Сиҙәмде һөрөү.* // *Сиҙәм ер.* ■ *Ғәйни ағай ат эсереп ҡайтҡас, .. ишек алды сиҙәмгә буйлы балаҫты йәйҙеләр ҙә иртәнге сәйҙе эсергә ултырҙылар.* Т. Йәнәби. *Ҡактүбә бригадаһында һөрөнтө ерҙәр бик аҙ, .. күберәк сабынлыҡ та, мал көтә торған сиҙәм ерҙәр генә.* Ә. Вәли.

♦ **Күңел сиҙәме** бығаса билдәле булмаған йәшерен тойғо. *Ғимайға был һүҙҙәр [Тайнов әйткән һүҙҙәр] электр тоғы һымаҡ тәьҫир итте. Тайнов оҫта гипнотизер кеүек, уның һөрөлмәй ятҡан күңел сиҙәменә ҡул һүҙҙы, .. башында уралып, ауыр түбал булып торған томанлы фекерҙәрен таратып ебәрҙе.* И. Насыри.

**СИҘӘМЛЕК** *и.* Сиҙәм ер, урын; сиҙәм. *Сиҙәмлектә ял итеү. Сиҙәмлектә уйнау.*

**СИҘӘМЛӘНЕҮ** *к.* Сиҙәмгә әйләнеү. *Элек мал тапаған ер хәҙер сиҙәмләнеп ята.*

**СИҘӘМСЕ** *и.* Сиҙәм асып иген сәсеүҙә ҡатнашҡан кеше. *Илебеҙ сиҙәм ерҙәрҙе үҙләштерә икән, бындай [алдынғы] яҙыусы, өйҙә ултырып түҙә алмай, беренсе сиҙәмселәр араһында булыуҙы үҙенең изге бурысы итеп иҫәпләне.* Ә. Бикчәнтәев.

**СИҘӘМҺЕНЕҮ** *к. диал.* Сиҙәмләнеү.

**СИЖЕН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Төрмә, зиндан. *Сәзауырҙыр ул уғлана сижен, зиндан.* Ҡол Ғәли.

**СИЖЖИЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Яндырылмаған кирбес.

**2.** Дини ҡарашса, тамуҡ утында яндырылған таш (йәнәһе унда ошо таш менән язаланырға тейешле кешеләрҙең исеме яҙылған).

**СИК** [1] *и.* **1.** Эргәләш өлкәләрҙе, биләмәләрҙе, участкаларҙы айырып, берәй территорияның сите һаналған шартлы һыҙыҡ; айырыу һыҙығы. *Колхоз сиге. Европа һәм Азия араһындағы сик.* ■ *Бирелгән ерҙең сиге ошолай: Аллагол тауынан Ҡарағаслы ҡыр аша .. Дәүләт баҙлауына тиклем.* Т. Хәйбуллин. *Фронт уртаһында «Ура!» ҡалҡты, аралағы сиктәр юйылды.* Р. Ниғмәти. / Эргәләш дәүләттәрҙең территорияларын йәки һыуҙарын айырып торған шартлы һыҙыҡ; рубеж. *Дәүләт сиге. Совет сиктәрен һаҡлау. Сикте боҙоу.* ■ *Ҡарсығалай үткер ялан егетен ил сигенә һаҡсы иттеләр.* Ҡ. Даян.

**2.** Нимәнеңдер сите, барып бөткән өлөшө. *Сиге күренмәй йәйелеп ятҡан киң, тигеҙ яланды ҡырҡып үткән оҙон, һай, йәйпе йылға буйына Ялпаҡйылға ауылы ултырған.* Ғ. Дәүләтшин. *Бар ине далаларҙа йөрөгән ваҡыт, ер сигенә сыға алмай һыныбыҙ ҡатып* (Бәйеттән).

**3.** Дөйөм ҡабул ителгән норма, сама. *Сикте белмәү. Сиктән артыҡ. Һәр нәмәнең сиге була.* ■ *Ҡадир менән уның араһы дуҫлыҡ сигенән сыҡманы.* Б. Бикбай. *Диңгеҙҙең ҡотороуы хәҙер сиктән ашты. Ләкин Зөлхизәне был ҡурҡытмай.* З. Биишева. / Нимәнеңдер иң юғары дәрәжәһе. *Хыялдарҙың сиге.* ■ *Үмәр карттың асыуы сигенә етте.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Аҙаҡ** (*йәки* **ахыр**) **сиктә** ахырҙа, һуңында, иң һуңғы һөҙөмтәлә.— *Ахыр сиктә сығып ҡасҡым, юғиһә буш торғанда туҡмалыр инем шул.* Т. Хәйбуллин. **Ер сиге** *шул уҡ* **йәһәннәм тишеге** (*ҡар.* **йәһәннәм**). *[Шафик:] Колхозыбыҙ райондан алыҫ, ер сигендә ята.* Я. Хамматов. **Сиккә етеү** ниндәйҙер эш-хәл дәрәжәһенә етеү. *Илар сиккә етеү.* **Сиктән тыш** үтә ныҡ; артыҡ. *Сиктән тыш ауыр. Сиктән тыш күп. Сиктән тыш уҫал.* ■ *Ольга .. Эткол байға тыштан ғына ялтырай, ләкин эске уҫаллығы сиктән тыш ҡабарған.* Т. Хәйбуллин. **Сик** (*йәки* **сиге**) **юҡ** саманан артыҡ, самаһы юҡ. *Таҙ шәһәргә барып инә. Шәһәрҙә кешенең күплегенә сик юҡ* (Әкиәттән).

**СИК** [2] *и. диал. ҡар.* **сигә** [2].

**СИККИН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Бысаҡ. *Ниҙәрҙе киҫмәйҙер үткер сиккин.* М. Ғафури.

**СИКЛЕ** [1] *с.* Сикләнгән, самалы, аҙ. *Ауылда хәҙер йылҡы малы сикле.* ■ *Врачтар һаны 5 йыл буйына бер үк һанда тора. Хатта фельдшерҙарҙың артыуы ла бик сикле.* «Совет Башҡортостаныының ун йылы», 1929.

**СИКЛЕ** [2] *бәйл. диал.* Тиклем.

**СИКЛӘМӘ** *и.* Кемдең йәки нимәнеңдер эш-хәлен сикләгән шарт. *Сикләмә ҡуйыу.*

**СИКЛӘНГӘНЛЕК** *и.* Сикләнгән (2 мәғ.) хәл. *Бөтәһенән элек төп герой — Булат образы уңышлы сыҡҡан. Дөрөҫ, унда бер ни тиклем сикләнгәнлек, артығыраҡ сабырлыҡ һиҙелә һиҙелеүен.* Ә. Харисов.

**СИКЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Бер сик [1] (1 мәғ.) менән айырылыу; сиктәш булыу. *Башҡортостан көнсығыштан Силәбе өлкәһе менән сикләнә.*

**2.** Ниндәйҙер бер сама менән ҡәнәғәтләнеү, туҡталыу. *Өлгәшкән уңыш менән сикләнеү.* ■ *[Ғатауллин] ни тип тә яуап бирә алманы, тик: — Әллә инде,— тип әйтеү менән сикләнде.* С. Агиш. *Байрамда Тимер ҡалаға, Нина янына бара алманы, ҡотлау телеграммаһы биреү менән генә сикләнде.* Б. Бикбай.

**СИКЛӘҮ** *к.* **1.** Сик [1] (1 мәғ.) менән айырыу. *Урал йылғаһы Башҡортостандың көнсығышын сикләп үтә.*

**2.** Ниндәйҙер сик, сама ҡуйыу. *Ҡарттың эшен төнгө ҡарауыл менән сикләмәй, уға башҡа эштәр ҙә ҡушалар, күрәһең.* М. Ғафури. *Бәй, сикләргә кәрәк ине ярамаған был эште.* Т. Арслан.

**СИКЛӘҮЕС** *и.* Нимәнеңдер эшен автоматик рәүештә бер сама менән сикләй торған ҡулайлама. *Электр сикләүесе.*

**СИКЛӘШЕҮ** *к.* Уртаҡ сик менән айырылыу; сикләнеү. *Урмансы ауылы .. Азия менән Европа сикләшкән урынды төйәк иткән.* Ғ. Аллаяров.

**СИКТЕРЕҮ** [1] *к. йөкм. ҡар.* **сигеү** [1]. *Атты сиктереү. Уйынан сиктереү.*

**СИКТЕРЕҮ** [2] *к. йөкм. ҡар.* **сигеү** [2]. *Рәхәт сиктереү. Яфа сиктереү.* ■ *Фатима .. яңы тормоштоң тәмен, бәхетен белмәй әле, уны һаман иҫке, ағыулы тормош иҙә, йәберләй, ҡыҫа, михнәт сиктерә.* Ш. Шәһәр.

**СИКТЕРЕҮ** [3] *к. йөкм. ҡар.* **сигеү** [3]. *Ҡулъяулыҡ сиктереү.*

**СИКТӘШ** *с.* Сиктәре (1 мәғ.) уртаҡ; эргәләш. *Сиктәш колхоз. Сиктәш булыу.— Рәйсә елгә бирен ҡуйып ҡарай сиктәш ҡырҙарҙы: бына быныһы «Нур» ҙың һәр йыл данлы уңыш биргән ерҙәре.* Х. Кәрим.

**СИКҮШКӘ** [*рус.* чекушка] *и. һөйл.* Ике йөҙ илле грамм һыйышлы араҡы шешәһе.

**СИКҺЕҘ** *с.* **1.** Сиге, осо-ҡырыйы булмаған, күренмәгән. *Сикһеҙ дала. Сикһеҙ диңгеҙ. Сикһеҙ йыһан. Сикһеҙ киңлек.* ■ *Беҙ, гүйә, сикһеҙ, төпһөҙ диңгеҙ өҫтөндә бик ваҡ юныскылар кеүек йөҙәбеҙ.* Д. Юлтый. *Сикһеҙ зәңгәр күктең әле ул, әле был ерендә, шаян күҙҙәр кеүек быҙылдашып, яҡты йондоҙҙар ҡалҡты.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Сиккә, самаға һыймаған, саманан артыҡ. *Сикһеҙ байлыҡ. Сикһеҙ көс. Сикһеҙ мөхәббәт. Сикһеҙ шатлыҡ.* // *Сикһеҙ ҙур. Сикһеҙ киң. Сикһеҙ көслө. Сикһеҙ күп. Сикһеҙ гәжәпләнеү. Сикһеҙ ҡурҡыу. Сикһеҙ ҡыуаныу.* ■ *Өйрәнсек .. уҙ эшенән сикһеҙ риза һәм шат булып йәшәй биргән.* З. Биишева. *Айсыуаҡтың ҡыуанысы сикһеҙ булды ул саҡта.* Т. Килмөхәмәтов.

**СИКҺЕҘ-ҠЫРЫЙҺЫҘ** *с.* Осо-ҡырыйы булмаған, күренмәгән. *Сикһеҙ-ҡырыйһыҙ дала.*

**СИКӘ** *и.* Баш һөйәгенең ҡолаҡтан маңлай һөйәгенә тиклем булған ике яҡ эргәһе. *Сикә тамыры. Сикә һөйәге. Сикәгә сабыу.* ■ *Генерал .., бармаҡтары менән сикә һаҡалдарын һыйпаштырып, Никольскийға ҡараны.* А. Карнай. *Гөлйемеш бер ни аңламаған Хәлиттең ике сикәһен тос ҡулдары менән уңлы-һуллы сәпәргә тотондо.* Ф. Рәхимғолова.

♦ **Ҡыҫыҡ сикә** *кар.* **ҡыҫыҡ** [1]. **Сикәгә тейеү** асыуҙы ҡабартыу, сәмләндереү. *Гөлшаттың һүҙҙәре Нараттың сикәһенә тейҙе. «Беҙҙекеләр еңелә, ә ул ауыҙ йыра!» — тип уйланы ул, ҡыҙға үпкәләп.* Ф. Әсәнов. **Сикә һаҡалы** *кар.* **һаҡал** [1].

● *Сикәһе тарҙың күңеле тар.* Мәҡәл.

**СИКӘЛЕК** *и.* Йүгәндең сикә буйлап төшкән ян ҡайышы. *[Әбей — ҡыҙҙарға:] Ҡаҙаҡтар ҡасҡаныгыҙҙы .. белеп ҡалып, арттан ҡыуһа, мин аттарының .. айылдарын, бауырлыҡтарын, күмелдерек-һағалдырыҡтарын һәм йүгән-нуҡталарының сикәлектәрен ҡырҡып бөтөрөрмөн* (Хикәйәттән).

**СИКӘЛӘҮ** *к.* Сикәгә һуғыу. *Әхмәҙи уландарын сикәләп тә алды. Малайҙар, ауыҙҙарына йөҙөк йәшергән һымаҡ, ләм-мим һүҙ өндәшмәне.* Ж. Кейекбаев.— *Еңгәң кешене таный белә ул .. Бәхетле бул, кәйнеш! — тине лә ул [Фатима], Тимерҙе яратып сикәләп алды һәм алдан барыусыларҙы ҡыуып етте.* Б. Бикбай.

♦ **Сикәләп үреү** *кар.* **үреү** [2]. *Ете-һигеҙ йәштәрҙә булыр, ҡыҙ бала... Сикәләп үргән сәстәре күптән тарамағанға ойошоп, араһына мендәр йөндәре һырып бөткән.* Һ. Дәүләтшина.

**СИКӘЛӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **сикәләү.**

**СИКӘНДЕРЕҮ** *к.* Һыуыҡтан йәки һыуыҡ һыуҙан тәнде ҡапыл зымбырлатып өшөтөү. *Айбулат һыуыҡ ҡулдары менән Гөлйөҙөмдө сикәндерә-сикәндерә юрған аҫтына инеп ятты.* Һ. Дәүләтшина.

**СИКӘНЕС** *с.* **1.** Һыуыҡ булғандан төшөргә, тейергә ҡурҡҡанда әйтелә. *Сикәнес һыу.*

**2.** *кар.* **сирҡаныс** 1. *«Дошман!“ — тине бабай. Исеме әйтеү өсөн булды сикәнес.* Т. Морат.

♦ **Сикәнес алыу** һыу инер алдан һыуыҡҡа өйрәнер өсөн тәнде һыуға сумдырып алыу.

**СИКӘНЕҮ** *к.* **1.** Һыуыҡтан йәки һыуыҡ һыуҙан тән ҡапыл зымбырлап өшөү. *Һыуға төшөргә сикәнеп тороу.*

**2.** *кар.* **сирҡаныу** 1.

**СИКӘСӨЙ** *и.* Тәгәрмәсте кейҙергәндән һуң күсәр башына тығып ҡуя торған сөй. *Сикәсөй ҡуйыу. Күсәрҙең сикәсөйө төшкән.*

**СИКӘСУҠ** *и. этн.* Ҡашмауҙың ике сикәһенән төшөргән сулпылы, мәрйенле суҡ. *Сикәсуҡ тағыу.*

**СИҠ** *ОКШ.* Ҡапыл тамаҡ саҡырған тауышты белдергән һүҙ. *Сиҡ итеү.*

**СИҠАҠ** *и.* Ирекһеҙҙән сиҡ-сиҡ итеп, тамаҡтан килгән тауыш; тамаҡ саҡырыу. *Сиҡаҡ тотоу.*

**СИҠАҠЛАУ** *к.* Ҡабат-ҡабат сиҡ иткән тауыш сығарыу, сиҡ итеү. *Мазһар .. осколок тотоп сиҡаҡлай башлай.* С. Кулибай. *Йәнеш, өләсәһенең һүҙенә төшөнгәнен аңлатырға тырышҡан һымаҡ, сиҡаҡлап көлөп, талпынып ҡуйҙы.* З. Биишева.

**СИҠАН** *и.* Ҡып-ҡыҙыл булып ослайып, үҙәкләнеп сыҡҡан һыҙлаулы шешек. *Ғафарҙың тәненә сиҡан сығып, тишелеп һыҙлап йөҙәтә.* А. Таһиров.

**СИҠАНЛАУ** *к.* Сиҡан менән ҡапланыу, сиҡан сығыу. *Тәне сиҡанлап яфалана.*

**СИҠАНЫУ** *к. кар.* **сикәнеү** 1. *Һыуға төшөргә сиҡаныр тороу.*

**СИҠ-СИҠ, сиҡ та сиҡ** *окш.* Ҡабат-ҡабат сиҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сиҡ-сиҡ итеү. Сиҡ та сиҡ килеү.*

**СИҠЫ** *с. диал. кар.* **талымлы** 1.

**СИҠЫЛДАТЫУ** *к.* **1.** Сиҡ-сиҡ иттереү. *Сафуан көрһөндө, тамағын сиҡылдатып, ҡоласын йәйҙе.* Я. Хамматов.

**2.** Шуға оҡшатып тауыш сығарыу. *Асыҡ тәҙрә төбөндә ниндәйҙер музыкант скрипка сиҡылдата.* Б. Бикбай. *Зарлы көйгә һал да дуҫым, тарт, сиҡылдат гармунды.* Ш. Бабич.

**СИҠЫЛДАУ** *к.* Сиҡ-сиҡ итеү, сиҡ-сиҡ килеү. *Бынауы бала сиҡылдап тик ултыра, ауырып тора микән ни?* М. Тажи.

**СИҠЫЛДАШЫУ** *к.* **1.** *урт. кар.* **сиҡылдау.**

**2.** Асыуланып әйтешеү; ырләшеү.

**СИҠЫТ** *с. диал. кар.* **сибек** 1.

**СИЛ** [*гәр.*] *и.* Таулы ерҙә күпләп ҡар иреү йәки көслө ямғырҙар яуыу һ. б. сәбәпле йылғаларҙы ҡапыл ташыуға килтергән ләмле йәки ҡом ҡатыш ташлы хәтәр ташҡын. *Тетрәһен ер, йөҙ түбән китһен сәнәмдәр сылтырап! Әйҙә ташһын көслө силдәр, ут ҡабынһын йылтырап.* Ш. Фидаи.

**СИЛҒАУ** *и.* Аяҡ кейеме эсенән аяҡҡа урай торған сепрәк. *Сабата силгауы. Итек силгауы. Силгау урау.* ■ *Ҡойма буйына киптерергә элгән силгау менән сабаталарыма үреләм.* Н. Мусин. *Күсәрбаев .. һул аяғының үксәһе өйкәй башлағанын һиҙеп, .. силгауҙарын ҡабат урау өсөн ағас күләгәһенә ултырҙы.* Д. Исламов.

**СИЛИКАТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** *и.* Составында кремнезем булған минералдарҙың дөйөм атамаһы. *Тәбиғи силикаттар. Силикат заводы. Силикаттар химияһы.*

**2.** Күп кенә төҙөлөш һәм промышленность

материалдарының: быяланың, керамиканың, цементтың, бетондың, кирбестең һ. б. дөйөм атамаһы. *Силикат иҙмәһе. // Силикат буяу. Силикат елем. Силикат кирбес.*

**СИЛИКО́З** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. мед.* Оҙаҡ ваҡыт таш саңы йотоп эшләгән таусыларҙың профессиональ үпкә ауырыуы.

**СИЛЛАБИК** *с. әҙ.* Баҫымдың урынына ҡарамайынса һәр юлда билдәле һандағы ижекте һаҡлауға ҡоролған (шиғыр төҙөлөшөнә ҡарата). *Силлабик система. Силлабик шиғыр.*

**СИЛЛА́БО-ТОНИК** *с. әҙ.* Һәр юлда билдәле һандағы ижекте һаҡлауға һәм баҫымлы-баҫымһыҙ ижектәрҙе дөрөҫ ситраташтырыуға ҡоролған (шиғыр төҙөлөшөнә ҡарата). *Шиғыр төҙөлөшөнөң силлабо-тоник системаһы.*

**СИЛЛОГИ́ЗМ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и. лог.* Бирелгән ике фекерҙән өсөнсөгә килеү, һығымта сығарыу.

**СИ́ЛОС** [*рус.* ⟨*исп.*] *и.* Тураған йәш үләнде, үҫемлек һабағын, япраҡты һ. б. махсус ҡоролмаларҙа (соҡорҙа, башняла, траншеяла һ. б.) томалап әсетеү юлы менән әҙерләнгән һутлы мал аҙығы. *Ҡатнаш силос. Кукуруз силосы. Көнбағыш силосы. Силос башняһы. Силос комбайны. Силос һалыу.* ■ *[Әхмәҙуллин:] Александр Михайлович, һыйырҙарға .. йәннәт унда. Стеналарын таш менән йөҙләп дүрт силос ямы эшләттек.* Д. Исламов.

**СИЛОСЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **силослау**. *Силосланған кукуруз.*

**СИЛОСЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **силослау**.

**СИЛОСЛАУ** *к.* Силос итеп һалыу. *Кукуруз силослау. Үлән силослау.* ■ *Силослау өсөн кукуруздан башҡа көнбағыш үҫтерелә.* М. Хисмәтов.

**СИЛСИЛӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Нәҫел сынйыры. *Был дәүләттә мосолман мәҙһәбе бар, дәхи силсиләбеҙ вә юлыбыҙ бер.* М. Өмөтбаев.

**СИЛСӘ** *и.* 1. Йоғошло венерик ауырыу; сифилис.

2. *диал. ҡар.* **тилсә** 1. *Телеңә силсә сыҡҡыр.*

3. *диал. ҡар.* **лауыр** 1. *Муйынына силсә сыҡҡан.*

**СИЛСӘБИЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит. йылғ* Сәлсәбил. *Итер хеҙмәт һиңә нескә билдәр, ағыр унда хәмерҙәр, силсәбилдәр.* М. Ғафури.

**СИЛУЭ́Т** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* 1. Шәүлә кеүек бер төҫлө итеп, икенсе бер төҫтәге ерлеккә яһаған һүрәт. *География картаһындағы силуэтына ҡарайҙар ҙа шағирҙар Башҡортостанды йә ҡайын япрағына, йә йөрәккә, йәки дуҫының ҡулын ҡыҫырға һуҙылған уска оҡшаталар.* Ғ. Әмири. *Артиллеристарҙан Исмәғил Әбуталипов менән Ғиззәтуллин Ленин силуэты төшкән ҡәҙерле билетты алып, үҙҙәренең йөрәктәре янына һалып ҡуйҙы.* Ә. Ихсан.

2. *ҡар.* **шәүлә**.

**СИЛӘК** *и.* 1. Ағастан соҡоп яһалған ҡапҡаслы, баулы һауыт. *Дегет силәге.* ■ *Ҡыҙҙар .. ағас силәктәрен беләгенә элеп [һыйырҙарын] һауырға йыйына.* Т. Хәйбуллин. *Һылыу ҡыҙҙар еләк йыя силәктәрен элеп беләккә* (Халыҡ йырынан).

2. *диал. ҡар.* **көбө** 1.

3. *диал. ҡар.* **күнәк** 1.

● *Силәгенә күрә ҡапҡасы.* Әйтем.

**СИЛӘКЛӘП** *р.* Силәге-силәге менән. *Силәкләп еләк йыйыу. Ҡап-ҡара болот ҡапланы күкте, силәкләп ямғыр түкте лә түкте.* Ф. Мөхәмәтйәнов.

**СИМ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Көмөш, көмөш аҡса.

**СИМБИО́З** [*рус.* ⟨*гр.*] *и. биол.* Төрлө төргә ҡараған ике организмдың үҙ-ара ярҙамлашып бергә йәшәүе. *Актиния менән ҡыҫала симбиозы.*

**СИ́МВОЛ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* 1. Ниндәйҙер төшөнсәне, идеяны шартлы рәүештә билдәләгән нәмә һ. б. *Аҡ күгәрсен — тыныслыҡ символы.* ■ *Рус халҡы менән башҡорт халҡы араһындағы тарихи боевой дуҫлыҡтың символы сифатында күҙ алдына баҫҡан был [һәйкәл ҡуйылған] урында «дуҫлыҡ баҡсаһы» кеүек нәмә эшләп булыр ине.* К. Мәргән. *[Партиям], гүзәл киләсәктең символы һин, йәшәү сығанағы һин беҙгә.* Я. Ҡолмой.

2. *әҙ.* Ниндәйҙер уй-фекерҙе, кисерешне шартлы рәүештә биргән художестволы образ. *Символдар аша һүрәтләү.* ■ *Әҫәрҙән .. конкрет деталь — «бил быуыу» ирлек билдәһе, хеҙмәт һөйөүсәнлек символы.* Ә. Хәкимов. *Поэзияла гүзәллек, сафлыҡ символы булған сәскәләргә М. Ғафури лирикаһында ҡабат-ҡабат әйләнеп ҡайта.* Ғ. Рамазанов.

**СИМВОЛИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* 1. 19 быуат аҙағы — 20 быуат башындағы Европа һәм рус сәнғәтенең символды нәмә һәм күренештәр асылын сағылдырыу сараһы тип аңлап, үҙенә художестволы алым итеп ҡуйған йүнәлеше. *Рус символизмы. Сәнғәттәге символизм.*

2. *ҡар.* **символика** 1.

**СИМВОЛИК** *с.* 1. Нимәнеңдер символы булған, нимәнелер символлаштырған. *Символик күренеш. Символик образ. Символик тамға.* ■ *Яңы йыл — иң күңелле байрамдарҙың береһе. Сәғәт тантаналы рәүештә ун икене һуға. Һин инде үҙеңде символик сик аша атлап, яңы донъяға уҙған һымаҡ тояһың.* Ә. Бикчәнтәев.

2. Символизм (1 мәғ.) рухында яҙылған һүрәтләнгән. *Символик поэма.* ■ *Октябрҙең 50 йыллығына .. «Ер өсөн» тигән әҫәремде үҙем өсөн яңы символик планда эшләнем.* Ә. Лотфуллин. *Бөгөнгө шарттарҙа .. киң таралған һәм шунлыҡтан күбеһенсә символик мәғәнә алған образдар кеүек уҡ, йыр ҙа яңы философик -эстетик йөкмәтке менән байыға.* Ә. Хәкимов.

**СИМВО́ЛИКА** [*рус.*] *и.* 1. Нимәгәлер ҡайтарып ҡалдырылған символик мәғәнә. *Сәскәләр символикаһы. Һандар символикаһы.* ■ *Мөхәббәт тойғолары һәм кисерештәренең системаһын ингән .. символика арҡылы бирелешенә иң матур миҫалдар булып, бөтәһенән элек, «Сәлимәкәй», «Күсбикә», «Әй-һай ҙа, Бибикамилә» йырҙары тора.* Ә. Харисов. *Декадентсыл символикаға төшөү шағирҙың [С. Ҡудаштың] дәүерҙә үҙенсә поэтиклаштырыу алымы ғына түгел, бәлки обстановканы тәрән төшөнөп етмәү һөҙөмтәһе булып тора.* Ғ. Хөсәйенов.

2. *йыйн.* Символдар (1 мәғ.) системаһы. *Пионер символикаһы.*

**СИМВОЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* Символизм яҡлы кеше. *Символист рәссам. Символист шағир.*

**СИМВОЛЛАШТЫРЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **символлаштырыу.**

**СИМВОЛЛАШТЫРЫУ** *к.* Нимәнеңдер символы булыу, символы булып хеҙмәт итеү. *Зәминдәр карт образы .. ер кешеһенең тыуған еренә имәндәй тамырланыуын символлаштыра.* Ғ. Хөсәйенов. *Ҡаялағы һәйкәл .. кешенең ҡеүәтен символлаштыра.* Р. Хәкимов.

**СИМВОЛЛАШЫУ** *к.* Символға әйләнеү, символ хеҙмәтен үтәү. *Ул [образ] шағир теләгән яҡты йондоҙ булып символлашыу характерын алмаған.* Ә. Харисов.

**СИММЕНТАЛЬ** [*рус.* симментальский]: **симменталь тоҡом** бик күп һөт һәм ит бирә торған һыйыр тоҡомо. *Һәр һауынсыға 19 һыйыр беркетелгән. Малдар — симменталь тоҡомло.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1974, № 2.

**СИММЕТРИК** *с. ҡар.* **симметриялы.** *Симметрик королош.*

**СИММЕТРИ́Я** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Тикшерелә, ҡарала торған объектҡа ингән өлөштәрҙең тигеҙ, гармониялы һәм пропорциональ урынлашыуы. *Геометрик фигураларҙың симметрияһы. Кеше кәүҙәһе өлөштәренең симметрияһы. Симметрия менән урынлаштырыу. Симметрияны һаҡлау.*

**СИММЕТРИЯЛЫ** *с.* Симметрия законына ярашлы төҙөлгән, ҡуйылған; симметрияға эйә булған; симметрик. *Симметриялы өлөштәр. Симметриялы планировка. Симметриялы тәртиптә.* // *Симметриялы урынлаштырыу.*

**СИМПО́ЗИУМ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Махсус, күберәк ғилми мәсьәләгә арналған халыҡ-ара кәңәшмә. *Симпозиум үткәреү. Симпозиумды асыу.*

**СИМПТО́М** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** Ниндәйҙер ауырыуҙың үҙенә хас һиҙелеше йәки уның тышҡы билдәһе. *Ауырыуҙың симптомы.*

**2.** *кит.* Ниндәйҙер күренештең тышҡы билдәһе. *Кризис ҡтынайыуҙың симптомдары.*

**СИМТОМАТИК** *с.* Ауырыуҙың сәбәбен түгел, ә симптомдарын бөтөрөүгә йүнәлгән. *Симптоматик дауа. Дарыуҙың симптоматик тәьҫире.*

**СИМТОМА́ТИКА** [*рус.*] *и. мед.* Ниндәйҙер ауырыуға хас симптомдар йыйылмаһы.

**СИМУЛЯ́НТ** [*рус.*] *и.* Симулянтланып ҡыланған кеше.

**СИМУЛЯНТЛАНЫУ** *к.* Хәйләләү, алдашыу юлы менән берәй хәл йәки күренеш барлығы хаҡында ялған фекер тыуҙырыу, симулянтлыҡ эшләү. *Әгәр комиссия сәләмәт тип тапһа, майорға ни йөҙөм менән күренермен? «Ай-яй, ҡартлас, симулянтлана башлағанһың бит», тип мыҫҡыллап көлһә?* И. Абдуллин.

**СИМУЛЯНТЛЫҠ** *и.* Симулянтҡа хас сифаттар. *Симулянтлыҡ итеү.*

**СИМУЛЯ́ЦИЯ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Алдау маҡсатында нимәлер тураһында ялған фекер һ. б. тыуҙырыу, хәйләләшеү ғәҙәте.

**СИМФОНИ́ЗМ** [*рус.*] *и. муз.* **1.** Симфоник сәнғәт өлкәһендәге ижад.

**2.** Бер-береһенә ҡаршы ҡуйыуҙы, темаларҙы һәм тематик элементтарҙы эсенә алған эҙмә-эҙ үҫеш ярҙамында музыка әҫәрендәге төп художестволы фекерҙең бирелеше. *Башҡорт симфонизмы .. беҙҙең дәүерҙә генә [барлыҡҡа килә].* «Совет Башҡортостаны", 1968, 12 апрель.

**СИМФОНИК** *с.* **1.** Симфонияның музыкаль формаһы менән бәйләнгән. *Симфоник стиль. Теманың симфоник эшләнеше.*

**2.** Ҡыллы, тынлы һәм һуҡҡы инструменттар ансамбле тарафынан башҡарыуға тәғәйенләнгән. *Симфоник концерт. Симфоник музыка. Симфоник поэма. Симфоник әҫәр.* ■ *Утыҙынсы йылдарҙа Башҡорт музыкаһының тәүге симфоник партитуралары яҙылды.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 19 март. **Симфоник оркестр** ҡыллы, тынлы һәм һуҡҡы инструменттарҙан торған музыкаль ансамбль.

**СИМФОНИ́СТ** [*рус.*] *и.* Симфоник әҫәрҙәр ижад иткән композитор.

**СИМФО́НИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** Оркестр өсөн яҙылып, бер-береһенән музыкаһы һәм темпы менән айырылып торған 3—4 өлөштән ғибәрәт ҙур музыкаль әҫәр. *Лирик симфония. Бетховендың пастораль симфонияһы. Чайковскийҙың патетик симфонияһы.* ■ *Әле генә оркестр Р. Мортазиндың иң ҙур әҫәрен — тәүге симфонияһын башҡарҙы. Ул бер Мортазин ижадында ғына түгел, ә бөтә йәш башҡорт совет музыкаһында ла беренсе симфония, ҙур программалы әҫәр.* Ғ. Рамазанов. *Полк оркестры зыяратҡа тиклем .. үҙенең моңо менән йөрәктәргә төшә торған ҡайғылы симфониялар уйнап барҙы.* Б. Дим.

**2.** *күсм.* Төрлө тауыш, төҫ йәки тондарҙың гармоник ҡушылыуы. *Мин тыңлайым төҙөлөш симфонияһын йөрәгемдә хистәр уятып.* М. Тажи. *Их! Йырлағы килә тормош симфонияһын композиторы булып донъяла.* Ә. Вәли.

**СИН** [1] *и. һөйл.* Тирә.

**СИН** [2] *и. иҫк. ҡар.* **ҡытай** [1].

**СИНАГО́ГА** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Йәһүд динендәге кешеләрҙең ғибәҙәт йорто һәм шул кешеләр йәмғиәте.

**СИНГАРМОНИ́ЗМ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. лингв.* Төрки һәм ҡайһы бер башҡа телдәрҙә һүҙҙәге һуҙынҡыһындәрҙең тамырҙағы һуҙынҡы менән ярашыуы.

**СИНГАРМОНИК** *с.* Сингармонизм законына нигеҙләнгән. *Сингармоник телдәр.*

**СИНГӘР** *с. диал. ҡар.* **ҡырлас** [1]. *Сингәр тау.*

**СИНДИКАЛИ́ЗМ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Халыҡ-ара эшселәр хәрәкәтендә идеологик һәм политик йәһәттән анархизм йоғонтоһондағы ағым.

**СИНДИКАЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* Синдикализм яҡлы кеше.

**СИНДИКА́Т** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Монополистик берекмәнең заказ биреү, серье һатып алыу, етештерелгән нәмәне һатыу эштәрен уртаҡ сауҙа ойошмаһы аша ғәмәлләштергән бер төрө. *«Кун синдикаты» бөгөн ут эсендә — акса тулмай, акса кассала ... Ҡосаҡлағас гәйеп Хажиҙы, ябып булмай уны башҡаға.* Ғ. Хәйри.

**2.** Ҡайһы бер буржуаз илдәрҙәге профсоюз исеме.

**3.** Советтар Союзында 1920 йылдар аҙағына тиклем трестарҙы берләштергән хужалыҡ ойошмаһы.

**СИНДИКАТЛАШТЫРЫУ** *к.* Синдикаттарға (1 мәғ.) берләштереү. *Синдикатлаштырылған промышленность.*

**СИНДРО́М** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Ниндәйҙер бер сир һәм патологик үҙгәрештәрҙең берҙәм үҫеш механизмы тыуҙырған ауырыуға хас билдәләр йыйылмаһы.

**СИНЕГЕҮ** (синек*≠*) *к. һөйл.* Күҙ тейеү (*кар.* **күҙ**).

**СИНЕ́КДОХА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. әҙ.* Метонимияның бер төрө: бер нәмәнең мәғәнәһен икенсеһенә уларҙың үҙ-ара һан нисбәтенә ҡарап күсәреүгә ҡоролған алым (бөтөн урынына нәмәнең өлөшөн, күп урынына әҙҙе йәки, киреһенсә, нәмәнең өлөшө урынына бөтөндө һ. б. атау, мәҫ. «урмандарҙа бысаҡ тотҡан ҡараҡ йөрөй» тип әйтеү урынына «урмандарҙа бысаҡ йөрөй» тип кенә биреү).

**СИНЕКТЕРЕҮ** *к. һөйл.* Күҙ тейҙереү (*кар.* **күҙ**).

**СИНЕТЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **синетләү**. *Мунсамды синетләттем.*

**СИНЕТЛӘҮ** [*рус.* чинить] *к. һөйл.* Еңелсә төҙәтеү, ремонт яһау (өй-ҡаралтыға ҡарата). *Өйҙө синетләү.*

**СИНЕТЛӘШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **синетләү**. *Өйҙө синетләшеү.*

**СИНИЛЬ** [*рус.* синильный]: **синиль кислотаһы** әсе миндаль еҫле төҫһөҙ шыйыҡлыҡ сифатындағы ағыу.

**СИНКЕ** [*рус.* синька] *и.* Аҡ кейем-ҡаралдыға, ҡағыҙға, шулай уҡ йыуылған кергә һ. б. күкһел төҫ бирә торған буяу. *Синкегә маныу. Мейесте синке һалып ағартыу.*

**СИНКЕЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **синкеләү**. *Киленсәк башына синкеләнгән аҡ урамал ураған.* Ғ. Ғүмәр.

**СИНКЕЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **синкеләү**.

**СИНКЕЛӘҮ** *к.* Синкегә маныу. *Күлдәкте синкеләү.*

**СИНКРЕТИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кит.* Нимәнеңдер үҫешеп етмәгән сағына хас булған бөтөнлөк, тәүге берләшкән хәл. *Тәүтормош сәнғәтенең синкретизмы.* ■ *Синкретизм бөтә халыҡтарҙың тәүге ғалимдары өсөн тәбиғи хәл булһа кәрәк.* Ә. Харисов.

**СИНКРЕТИК** *с.* Синкретизмы менән айырылған; төрлө-төрлө айырылмаҫ өлөштәрҙән торған. *Синкретик ижад. Синкретик сәнғәт.* ■ *Башҡорт халҡының борон-боронғо синкретик сәнғәте .. тора-бара төрлө жанрҙарға бүленеп, ҡобайырҙар, йырҙар һ. б. жанрҙар айырыла барған булырға тейеш.* Ғ. Хөсәйенов. *Ҡобайырҙарҙа мәҡәл һәм йомаҡтарҙың тулып ятыуы был жанрҙың башҡорт халыҡ поэзияһының боронғо бер төрө, үҙендә мәҡәл, йомаҡ кеүек башҡа жанрҙарҙың синкретик ҡушылмаһын һаҡлаған төрө икәнен .. әйтеп тора.* Ә. Харисов.

**СИННЕК** [*рус.* сенник] *и.* **1.** Бүртлегенә бесән тултырыла торған мал һарайы. *[Садрисламды] синнеккә индереп, ҡоро бесәнгә һалғандар, өҫтөнән бикләп алғандар.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *диал.* Лапаҫ.

**3.** *диал. кар.* **аран** 1.

**4.** *диал. кар.* **аласыҡ** 2.

**5.** *диал.* Соланса. *Юлбаҫар .. тауарын синнеккә бикләп, аҫҡыҫын һатыусының үҙенә бирҙе, ти* (Әкиәттән).

**СИНО́Д** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Рус православие сиркәүенең Пётр I-се япҡан патриарх идаралығын алмаштырып, 1917 йылға тиклем эшләп килгән юғарғы органы; хәҙерге ваҡытта патриарх эргәһендәге кәңәшсе орган.

**2.** Протестант сиркәүенең рухани һәм донъяуи кешеләрҙән тороп, мөһим сиркәү эштәрен хәл иткән йыйылышы.

**СИНО́ЛОГ** [*рус.*] Синология буйынса белгес.

**СИНОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨*лат.* + *гр.*] *и.* Ҡытай телен, Ҡытайҙың тарих, экономика, политика, философия һәм культураһын өйрәнгән фәндәр йыйылмаһы.

**СИНО́НИМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Икенсе бер һүҙгә мәғәнә яғынан тап килгән йәки яҡын булған һүҙ (мәҫ. «батыр» — «ҡыйыу»). *Абсолют синонимдар. Стилистик синонимдар. // Синоним һүҙҙәр. Синоним сифат.*

**2.** Тап килгән, мәғәнәләш төшөнсә. *Салауат — мәңгелек тарих һәм иң һоҡланғыс экиәт тә, иң аҫыл йыр һәм иң әрнеүле йөрәк яралары ла. Башҡорт һүҙенең, тотош бер халыҡ атамаһының синонимына әйләнгән был исем.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 7 февраль.

**СИНОНИМИК** *с. лингв.* Синоним булып торған, тиң мәғәнәле йәки мәғәнә яғынан оҡшаш. *Синонимик һүҙҙәр. Синонимик төркөм. Синонимик әйтем.*

**СИНОНИ́МИКА** [*рус.*] *и.* **1.** *лингв.* Берәй телдең синонимдар йыйылмаһы.

**2.** Лексикологияның синонимдарҙы өйрәнгән бүлеге.

**СИ́НОНИМИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. лингв.* Әйтелеше яғынан төрлө булған һүҙҙәрҙең мәғәнә оҡшашлығы. *Лексик синонимия. Морфологик синонимия. Синтаксик синонимия.*

**СИНО́ПТИК** [*рус.*] *и.* Көндөң ниндәй булырын алдан әйткән белгес, метеоролог.

**СИНОПТИ́К** *с.* **1.** Ҡатмарлы бер бөтөн нәмәнең өлөштәрен дөйөм күҙәткән. *Синоптик анализ. Синоптик таблица.*

**2.** *метеор.* Метеорологик шарттарға, һауа торошона мөнәсәбәтле. *Синоптик процестар. Синоптик шарттар.*

♦ **Синоптик карта** һауа торошон бер ваҡытта күҙәткән мәғлүмәттәрҙе һандар һәм шартлы тамғалар менән күрһәткән географик карта. *Түбәнге ҡатлам синоптик картаһы. Юғарғы ҡатлам синоптик картаһы.*

**СИНО́ПТИКА** [*рус.*] *и.* Метеорологияның көндөң ниндәй булырын алдан әйтеү методтарын эшләү маҡсатында атмосфералағы һауа шарттарын һәм уның үҙгәрешен билдәләгән процестарҙы өйрәнгән бүлеге.

**СИНСЕЛ** *с. диал. кар.* **сибек** 1. *Синсел бала.*

**СИНТА́ГМА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. лингв.* Интонация һәм мәғәнә яғынан бер бөтөн синтаксик берәмек тәшкил иткән һүҙбәйләнеш.

**СИНТАКСИК** *с. лингв.* Синтаксисҡа мөнәсәбәтле. *Синтаксик бәйләнеш. Синтаксик мөнәсәбәт. Һөйләмгә синтаксик анализ.*

**СИ́НТАКСИС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *лингв.* Берәй телгә хас һөйләм төҙөлөшө һәм һөйләм эсендә һүҙҙәрҙең бәйләнеш ысулы. *Ҡушма һөйләм синтаксисы. Ябай һөйләм синтаксисы.*

2. Грамматиканың һүҙҙәрҙең бәйләнеш закондарын һәм һөйләмдәрҙең төҙөлөшөн өйрәнгән бүлеге.

**СИ́НТЕЗ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Нәмә һәм күренештәрҙе бер бөтөн көйө, уның өлөштәренең берҙәмлегендә һәм үҙ-ара бәйләнешендә өйрәнгән ғилми тикшеренеү методы; *киреһе* анализ. .. *бала «ат» һүҙен уҡый алмай, ике таныш хәрефте ҡуша белмәй. Бында уҡытыусы синтез алымдарының береһен ҡуллана.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1966, № 1. / Ике йәки бер нисә нәмәнең бергә ҡушылыуы, берләштерелеүе. *Теория менән практика синтезы.*

2. *хим.* Ябай матдәләрҙе йәки элементтарҙы ҡушып, бер ҡатмарлы химик матдәләр алыу ысулы. *Химик синтез. Аҡһымдар синтезы. Органик матдәләр синтезы.*

**СИНТЕЗЛАНЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **синтезлау.**

2. *хим.* Синтез (2 мәғ.) ысулы менән барлыҡҡа килеү. *Аҡһымдарҙың синтезланыуы.*

**СИНТЕЗЛАУ** *к.* **1.** Синтез (1 мәғ.) яһау; дөйөмләштереү. *Образды синтезлау.*

2. *хим.* Синтез (2 мәғ.) ысулы менән барлыҡҡа килтереү. *Аммиакты синтезлау. Гемоглобинды синтезлау. Яңы матдә синтезлау.*

**СИНТЕТИК** *с.* **1.** Синтез (1 мәғ.) ҡулланыуға нигеҙләнгән. *Тикшереүҙең синтетик ысулы. Фекерләүҙең синтетик һәләте. Синтетик ысул ҡулланыу.*

2. *хим.* Синтезға (2 мәғ.) нигеҙләнгән. *Каучукты синтетик ысул менән алыу. Үҫемлектәрҙең синтетик эшмәкәрлеге.* / Синтез һөҙөмтәһендә алынған. *Синтетик каучук. Синтетик май. Синтетик сүс. Синтетик туҡыма. Синтетик яғыулыҡ.*

3. Айырым өлөштәрҙе бер бөтөнгә берләштергән, дөйөмләштергән. *Синтетик образ. Синтетик театр. Синтетик әҫәр.*

4. *лингв.* Һөйләмдә грамматик мөнәсәбәттәр һүҙҙең үҙенең формаһы менән бирелгән. *Синтетик телдәр. Телдең синтетик төҙөлөшө.*

**СИНТЕ́ТИКА** [*рус.*] *и. һөйл.* Синтетик материал һәм шулай уҡ шунан яһалған нәмә.

**СИ́НУС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *мат.* Мөйөштөң тригонометрик функцияларының береһе — тура мөйөшлө өсмөйөштә ҡыҫынҡы мөйөшкә ҡаршы ятҡан катеттың гипотенузаға нисбәтенән ғибәрәт.

2. *анат.* Ҡыуышлыҡ. *Лимфа тамырҙары синусы. Баш мейеһе синустары.*

**СИНУСО́ИДА** [*рус.* ⟨ *лат.* + *гр.*] *и. мат.* Мөйөш үҙгәреүгә ҡарап синустың үҙгәрә барыуын график рәүештә күрһәткән тулҡынлы һыҙыҡ.

**СИНУСОИДА́ЛЬ** [*рус.* синусоидальный] *с.* **1.** *мат.* Синусоида булып торған.

2. *физ., тех.* Синусоида буйынса үҙгәрә торған. *Синусоидаль тирбәлеш. Синусоидаль ток.*

**СИНФИ** [*ғәр.*] Синыфҡа (1 мәғ) мөнәсәбәтле. *Синфи айырма. Синфи дошман. Синфи ҡаршылыҡ.* ■ *[Мурзин:] Онотмағыҙ, иптәштәр, синфи көрәштә тик беҙҙең большевиктар юлы ғына тулы еңеүгә алып барып сығарасаҡ.* Һ. Дәүләтшина. *Донъяла бар бер һуғыш, тик ул һуғыш — синфи һуғыш.* Т. Йәнәби. / Билдәле бер синыфҡа һәм уның идеологияһына хас. *Синфи аң. Синфи ҡараш. Синфи әҙәбиәт.* ■ *Бына шул рәүешсә, фольклор синфи көрәш, синфи тәрбиә ҡоралы булып хеҙмәт иткән, әле лә шул уҡ ролде уйнай.* Ғ. Амантай.

**СИНХРОНИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кит.* Ике йәки бер нисә күренештең, процестың бер ваҡытта, параллель барыуы, бер үк ваҡытлылыҡ.

**СИНХРОНИК** *с. кит.* Синхронизм менән айырылып торған, нимәнеңдер бер үк ваҡытта барғанын күрһәткән. *Синхроник күренеш.* **Синхроник таблица** бер үк ваҡытта барған ваҡиғаларҙы сағылдырған хронологик таблица.

**СИНХРОНИ́Я** [*рус.*] *и. кит.* Синхронизм.

**СИНХРОНЛАШТЫРЫУ** *к.* Ике йәки бер нисә күренеште йәки процесты ваҡыт яғынан тап килтереү.

**СИНХРОНЛЫ** *с.* **1.** *кит.* Ваҡыт буйынса тап килгән, бер үк ваҡытта барған. *Моторҙың синхронлы эшләнеше.*

2. *тех.* Синхронизм принцибын ҡулланыуға нигеҙләнгән, ҡоролған. *Синхронлы двигатель. Синхронлы мотор. Фильмды синхронлы төшөрөп алыу.*

**СИНЫФ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Билдәле бер тарихи ижтимағи эшмәкәрлек системаһында тотҡан урыны, етештереү ҡоралына ҡарата булған мөнәсәбәте, ижтимағи хеҙмәт ойошторолошондағы роле, дөйөм байлыҡтағы өлөшө буйынса айырылған ҙур халыҡ төркөмө. *Эшселәр синыфы. Капиталистар синыфы.* ■ *Бөтә донъя халҡы .. синыфтарға бүленгән һымаҡ, Россия мосолмандары ла төрлө синыфтарға бүленә.* Һ. Дәүләтшина.

2. *иҫк.* Мәктәп курсындағы бер баҫҡыс; класс. *Беренсе синыф. Алтынсы синыф.* ■ *Ҙурҙар, юғары синыф уҡыусылары, спектакль ҡуя.* С. Агиш. / Бергә уҡып, дәресте бергә алған уҡыусылар төркөмө.

**СИНЫФТАШ** *и.* **1.** Бер синыф (1 мәғ.) вәкилдәре (бер-береһенә ҡарата). *Синыфташ туғандар.*

2. *иҫк.* Бер синыфта (2 мәғ.) уҡыусылар (бер-береһенә ҡарата); класташ. *Синыфташ балалар.*

**СИНЫФҺЫҘ** *с.* Синыфтарға (1 мәғ.) бүленмәгән. *Синыфһыҙ йәмғиәт.*

**СИНЬО́Р** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Италияла ир-аттың атамаһы; әфәнде (ир-аттың фамилияһына йәки исеменә ҡушып әйтелә). *[Пиккио:] Мин һеҙ синьор Йәғәфәр Моратшиндар тип беләм.* М. Кәрим.

**СИНЬО́РА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и* Италияла ҡатын-ҡыҙҙың атамаһы; ханым (ҡатын-ҡыҙҙың фамилияһына йәки исеменә ҡушып әйтелә).

**СИНЬОРИ́НА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Италияла: ҡыҙҙарҙың атамаһы, туташ (ҡыҙҙың фамилияһына йәки исеменә ҡушып әйтелә).

**СИНӘҮ** *к. диал.* Сигәләү. *Ҡаҙан синәү. Тирмә уғын синәү. Бал ҡорто тулған күҙәнәкте синәп ҡуйған.*

**СИНӘҮЕС** *и. диал. кар.* **сигә** [1] 1.

**СИНӘҮЛЕ** *с. диал.* Самалы. *Көтөү урыны синәүле.*

**СИҢЕРТКӘ** *и.* **1.** (*йәки* ялан **сиңерткәһе**) Оҙон артҡы аяғы менән һикереп йөрөй торған

бөжәк. *Июнь айының аяҙ, эҫе көнө. .. Сиңерткәләр үлән баштарына менеп сыр-сыу килә.* С. Агиш. **Айыу сиңерткәһе** эре йәшел ялан сиңерткәһе. **Ер сиңерткәһе** өңдә йәшәй торған ҡыҫҡа аяҡлы эре һоро сиңерткә. **Таш сиңерткәһе** ҡырсында, тауҙа йәшәй торған йыуан, эре сиңерткә.

**2.** (*йәки* **ҡара сиңерткә**) Туры ҡанатлылар төркөмөнә ҡараған, яу булып осоп йөрөп, игенде, үләнде бөтөргән зарарлы ауыл хужалығы ҡорткосо. *[Кәрим:] Бына афәт! Игенде харап итә бит был сиңерткә яуы.* Ғ. Ғүмәр.

**3.** (*йәки* **өй сиңерткәһе**) Туры ҡанатлылар төркөмөнә ҡараған, ата енеслеһе ҡанаттарын бер-береһенә ышҡып сөр-сөр иткән тауыш сығарған өй бөжәге. *Мейес аралығында сиңерткәләр сырылдай.* З. Ғәлимов.

**4.** *һөйл.* Һикерәңләп-йүгереклэп торған остоҡай ҡыҙҙарға әйтелә. *[Гөлзифа — Асияға:] Күп һикерәңләп йөрө әле, сиңерткә, үҙемә килен булғаныңды һиҙмәй ҙа ҡалырһың.* Б. Бикбай.

● *Сиңерткәнән ҡурҡҡан иген икмәгән.* Мәҡәл.

**СИОНИЗМ** [*рус.*] *и.* Еврей буржуазияһының реакцион шовинистик политикаһы һәм идеологияһы.

**СИОНИСТ** [*рус.*] *и.* Сионизм яҡлы кеше.

**СИОНИСТИК** *с.* Сионизмға мөнәсәбәтле. *Сионистик ойошмалар.*

**СИП** [*рус.* цепь] *и.* Нимәнеңдер сиге буйлап тартҡан бау. *Ҡарас менән Килдеш ҡаҙаҡтарҙы .. сипкә сикле ҡыуалар ҙа кире ҡайталар* (Хикәйәттән).

**СИПАЙ** *с. диал. ҡар.* **бысый** 2.

**СИПАРАТ** [*рус.* сепаратор ⟨*лат.*] *и. һөйл. ҡар.* **сепаратор** *Гөлйөҙөм көнө буйы эшләп арыған, һыуһаған булһа ла ашыҡмай ғына һөттө сипаратҡа ҡойоп әйләндерә башланы.* Һ. Дәүләтшина. *[Миңлекамал — Хәтимәгә:] Йоҡоң туйып уянғас, иртәнге һауған һөттө сипаратҡа алып барып айырт та, ойоткан ойот.* Я. Хамматов.

**СИП-СИП** **1.** *окш.* Ваҡ ҡош, себеш, бәпкә тауышын белдергән һүҙ. *Сип-сип итеү. Сип-сип килеү.* ■ *Кескәй балалары күгәрсендең сип-сип ҡаршылайҙар эсәһен.* Х. Ғиләжев.

**2.** *сакр.* Себеш саҡыра торған һүҙ. *Кәримә йорттан сығып саҡырҙы [себештәрҙе]: «Сип-сип!» — тиеп.* Ғ. Ғүмәр.

**СИПСЫ** [*рус.* щипцы] *и. диал.* **1.** *ҡар.* **ҡыҫҡыс** 2.

**2.** *ҡар.* **ҡыпсыуыр.**

**СИПЫҠ** *с.* Сейләнеп, сыт-сыт итеп торған, бысый (күҙгә ҡарата).

**СИПЫЛДАҠ** [1] *и.* Ҡара-ҡаршы оҙон япраҡлы, эре суҡ сәскәле үҫемлек.

**СИПЫЛДАҠ** [2] *и. диал.* Үрмәләс.

**СИПЫЛДАТЫУ** [1] *ҡ.* Бысылдатып, сыт-сыт йомоу (күҙҙе).

**СИПЫЛДАТЫУ** [2] *ҡ.* Сип-сип (1 мәғ.) иттереү, сип-сип килтереү. *Бәпкәне сипылдатыу.*

**СИПЫЛДАУ** [1] *ҡ.* Бысылдап, сыт-сыт йомолоу (күҙгә ҡарата).

**СИПЫЛДАУ** [2] *ҡ.* Сип-сип (1 мәғ.) итеү, сип-сип килеү. *Себешкәйҙәр .. сипылдап ял итәләр саҡ ҡына.* К. Кинйәбулатова. *Сут-сут һайрай һандуғас, һары беснәк сипылдай.* А. Игебаев.

**СИПЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **сипылдау** [2].

**СИР** *и.* **1.** Берәй ағза боҙолоп йәки шешеп, оҙаҡҡа һуҙылған ауырыу. *Ашҡаҙан сире. Бөйөр сире. Йөрәк сире. Үпкә сире.* ■ *[Солтан:] Сирҙе докторҙар хәҙер киҫә лә ырғыта.* С. Кулибай. *Беҙҙе сирҙе йәшерергә түгел, өйрәттеләр тотоп ярырға.* Ғ. Сәләм. **Үҙ сире** ваҡыт-ваҡыт ҡуҙып, оҙаҡ йылдар бөтмәй торған ауырыу (мәҫ. быума, быума йүтәл, йөрәк сире, тапма һ. б.; ауырыуҙарҙың үҙ исемен атамаҫ өсөн әйтәләр).

**2.** Емеш-йәшелсәнең, ағастың, япраҡтың боҙолған, серегән ере. *Алма сире. Картуф сире. Япраҡ сире.*

**3.** *күсм.* Ғәйеп итерлек эш, ғәҙәт. *Эсеү эш түгел. Бөтөрөргә кәрәк совет йәштәренә үткән көндән ҡалған был сирҙе.* Ғ. Сәләм. *Сафаны халыҡ күҙенән төшөрөр өсөн бер сир эҙләйҙәр* (Хикәйәттән).

**4.** *диал. ҡар.* **ауырыу** 1. *Улым сирләй, алған дауалары шифала була күрһен сиренә.* М. Кәрим.

**СИРАЖ** *и.* **1.** Үлән йәки ярым ҡыуаҡ булып үҫкән күрекһеҙ генә ойошма сәскәле ҡый үләне һәм декоратив үҫемлек.

**2.** **сираждар, сираж һымаҡтар** Юшан, уймаҡ үлән һ. б. ике өлөшлө үҫемлектәр ҡараған ғаилә атамаһы.

**СИРАҠ** [1] *и.* Аяҡтың бәкәлдән тубыҡҡа тиклемге өлөшө. *Мәрхүмдең .. сираҡ һөйәктәре араһында ике әйәр өҙәнгеһе һәм йүгән ауыҙлығы сыҡты.* Н. Мәжитов. **Кәкре сираҡ** аяғы төҙ булмаған кешегә әйтелә. **Һалам сираҡ** аяғы нәҙек кешегә әйтелә.

**СИРАҠ** [2] *с.* Нык, тығыҙ ишелгән, ҡаты боролған (бау, епкә ҡарата). *Сираҡ арҡан. // Сираҡ ишеү.* ■ *Арҡанды .. сығыр менән ишкән саҡта тәкәне әкрен генә йөрөтәм, сираҡ ишелһен, аттар пушканы һөйрәп йөрөткәндә арҡан өҙөлмәһен, тим.* Н. Мусин.

**СИРАЛҠЫ** *с. диал. ҡар.* **сираҡ** [2]. *Сиралҡы еп.*

**СИРАЛЫУ** *ҡ.* Ҡатлап ишелеү. *Сиралған йөн.* ■ *Тығыҙ толом аҡ ебәк, тығыҙ үрем, сиралып, сәркеп китһәң, һиңә хурлыҡ* (Ҡобайырҙан).

**СИРАТ** [1] [*рус.* черёд] *и.* **1.** Эҙмә-эҙ бер-бер артлы низер йомошлау өсөн тәртип менән теҙелгән төркөм. *Сиратҡа баҫыу. Сиратҡа теҙелеү. Сиратта тороу.* ■ *Магазиндар әле асылмаған. Бер магазин алдында сират теҙелгән.* С. Агиш. *Палатка алдында — поход кухняһы, .. [унда] сират тора.* Д. Юлтый.

**2.** Айырым кешенең шул төркөмдәге урыны. *Сират алыу. Сират көтөү.* ■ *Башҡорттар төбәге расчёт алған саҡта, Сафаның, Әхмәҙи менән Ҡотлоярҙың сираты бергә тура килде.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Нимәлер үҙ тәртибендә эшләнер ваҡыт. *Шамай ҡулаҡтың малайы, һыныҡҡа һылтау табып, һуғашҡа бармаҫ өсөн больницаға китте. Нисауа, уға ла сират килеп етер әле.* М. Тажи.

**4.** Эш-хәл барышындағы эҙмә-эҙ тәртип. *Ғәйшә инде. Бөтәбеҙгә лә градусник ҡуйып, температураны үлсәне. Сират миңә етте.* С. Агиш. *Берәм-берәм һөйләнеләр, йырланылар, көлдөләр. Миңә сират килеп етте. Ҡарышманым.*

Д. Юлтый. / Шул тәртиптең ниндәйҙер өлөшө. *Төҙөлөштөң беренсе сираты.*

♦ **Сираттан тыш** алдан ҡаралмаған, планда билдәләнмәгән. *Сираттан тыш сессия.* ■ *Икенсе көндө партия район комитетының сираттан тыш киңәйтелгән ултырышы булды.* Ғ. Әмири. **Үҙ сиратында** үҙ урынында, яуап биреү, һүҙҙә ҡатнашыу рәүешендә. *Ҡунаҡ та үҙ сиратында йылмайып ҡуйҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**СИРАТ** [2] [*ғәр.*] *и.*, **сират күпере** Дини хөрәфәтсә, тамуҡ аша ожмахҡа үтә торған күпер. *Сират күперен кисеү.* ■ *[Билалов:] Йәннәт тигәндәре ысын булып, ундағы сират күпере минең ҡарамаҡҡа бирелһә, мин унан иң беренсе һине үткәрер инем.* Д. Исламов. *Сираттан үтәбеҙме, ҡалабыҙмы — хәлебеҙ унда булыр әллә ҡандай.* Аҡмулла.

**СИРАТЛАУ** *р.* Сират [1] (2 мәғ.) тәртибендә. *Сиратлап эшләү.* ■ *Һалдаттарҙы бер офицер сиратлап өҫтәл эргәһенән үткәрә.* Д. Юлтый. *Халыҡ батырҙарҙың икеһен дә батша итеп ҡуя. Былар сиратлап .. хөкөм итә [башлай]* (Әкиәттән).

**СИРАТЛАШТЫРЫУ** *к.* Береһен икенсеһе менән сиратлап алмаштырыу. *Эш менән ялды сиратлаштырыу. Сиратлаштырып сәсеү.*

**СИРАТЛАШЫУ** *к.* Береһе икенсеһе менән сиратлап алмашыныу. *Сиратлашып эшләү.* ■ *Көн дә эштән һуң сиратлашып, кем булһа ла, аҡсалы кеше аҡсаһыҙҙарҙы һыйланы.* Я. Хамматов.

**СИРАТЛЫ** *с.* Сират [1] (4 мәғ.) тәртибендә барған, сиратҡа һалынған. *Сиратлы эш.*

**СИРАТТАҒЫ** *с.* Сират [1] (4 мәғ.) буйынса килгән, сиратта торған. *Сираттағы ултырыш.* ■ *[Атайым] дегетте ялан яҡтарына алып барып һата ла, аҙыҡ-түлек тейәп ҡайта ине. Сираттағы бер сәфәренә ул мине лә алып китте.* С. Кулибай. *Ҡороталха буйындағы базанан көнсығышҡа, сираттағы маршрутҡа сығып киттек.* Д. Бураҡаев.

**СИРАТҺЫҘ** *р.* Сират [1] (4 мәғ.) һаҡламай. *Ҡадирға .. шунда уҡ ниндәйҙер ҡағыҙға ҡул ҡуйҙырып, алты һум аҡса бирҙеләр. Был хөрмәт йөҙөнән, уны сиратһыҙ үткәреү булды.* Б. Бикбай.

**СИРАТЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **сиратыу.** *Сиратылған еп.*

**СИРАТЫУ** *к.* Иләгән епте, йөндө ике ҡатлап ишеү. *Еп сиратыу цехы.* ■ *Тайба әбей сиратып ултырған йөнөн бер ситкә алып ҡуйҙы.* З. Биишева.

**СИРГӨПӘШ** *и. диал.* Рахит.

**СИРҒЫУ** *к. диал.* Сорғоу. *Таш сирғыны.*

**СИРЕГЕҮ** (сирек*ә*) *к. диал.* Бирсәйеү.

**СИРЕК** [*фарс.*] *и.* **1.** Ниндәйҙер күләмдең, дәүмәлдең дүрттән бер өлөшө. // *Сирек метр.* ■ *Йүгерек батыр .. йүгерек әбейҙе уҙып китеп, уны сирек көнгә артта ҡалдырып, майҙанға килеп тә ингән* (Әкиәттән).

**2.** Мәктәптә уҡыу йылының дүрттән бер өлөшө. *Беренсе сирек. Сирек планы.* ■ *Класыңда тәртип шәптән түгел икән, балаларыңа дүрт көн буйы дәрес биреү бер сирек уҡытҡандан да ауырға төштө.* М. Тажи.

**3.** Бер ҡаҙаҡ ауырлыҡтың дүрттән бер өлөшө (сама менән 100 грамға тиң). *[Ҡотлояр] бер сирек сәй .. алып ҡайтҡан.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Бер көнәк шыйыҡлыҡ күләменең дүрттән бер өлөшө (сама менән 3 литрға тиң). *Бейә башынан һәр көнгә берәр сирек .. ҡымыҙ ҡуйып иҫәпләргә мөмкин.* М. Ғөбәйҙуллин. *[Буләкәнов:] Мине аяҡтан йығыр өсөн бер сирек кәрәк.* И. Абдуллин. / Шул күләм һыйышлы ҙур шешә. *Ашъяулыҡ түшәлде. Сирек менән бал килде.* Ж. Кейекбаев. *Ҡулына сумка һәм сирек менән һөт тотоп Асма ҡайтып инә.* Ғ. Ғәйнуллин.

**5.** Аршындың дүрттән бер өлөшө (кирелгән баш бармаҡ менән һуҡ бармаҡ аралығына тиң). *Биш сирек оҙонлоғондағы балыҡ. Сирек аялай ҡар.* ■ *Берәр сирек, ярты аршын самаһындағы сөйҙәрҙең ике яҙ башын ослаған өсөн мең данаһына егерме биш тин түләйҙәр.* М. Ғафури. *Ҡыш булһа, [Польшала] ярты аршын, бер сиректән дә һыу сыға.* Д. Юлтый.

**6.** Айҙың дүрт фазаһының береһе. *Тәүге сирек. Һуңғы сирек.*

**7.** *иҫк.* Ярты дисәтинәгә тиң булған элекке ер үлсәү берәмеге. *Сәсһә, Ваһап, шул ауыл тирәһендәге баҫыуға бүтҡалыҡ тигән булып, кеше ыңғайына сирек йә утыҙ аҙым тары, шул тиклем уҡ ҡарабойҙай сәсер ине.* Ж. Кейекбаев. *Орлоғона уның ни әйтәйем, сирек ерем биш бот саҡ бирҙе.* Ғ. Амантай.

**СИРЕКЛЕК** *и.* Бер сирек (4 мәғ.) һыйышлы шешә.

**СИРЕКЛӘҮ** *р.* Сиреккә (4 мәғ.) һалып, сирегө менән. *Сиреклэп ҡойоу. Сиреклэп ташыу.* ■ *[Нәзирә:] Ғәзизәнең бал әсетеп һатыуын әллә ҡасан туҡтатырға кәрәк ине. Һин һаҡлап киләһең уны, Ямакаев. Ул саҡта һиңә теләһә ниндәй елғыуар нисек сиреклэп-сиреклэп бал ташыһын.* Я. Вәлиев.

**СИРЕ́НА** [1] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *физ.* Төрлө юғарылыҡтағы тауыш сығара һәм яңғыраған есемдең тирбәлеш һанын үлсәй торған ҡоролма.

**2.** Көсөргәнешле тауыш тулҡындары тарата торған ҡорамал (маяҡ, диңгеҙ карабы һ. б. нәмәлә ҡулланыла). *Маяҡ сиренаһы.*

**3.** Әсе һыҙғыртып тауыш бирә торған ҡысҡыртҡыс һәм уның тауышы. *Самолёттар алыҫтан пикелап килеп, сиреналарҙан йәмһеҙ тауыш сығарып, дивизияның боевой сафына бомба ырғыта һәм ата башланы.* Ә. Ихсан.

**СИРЕ́НА** [2] [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Грек мифологияһында: үҙенең йыры менән моряктарҙы әүрәтеп һәләк итә торған ҡатын-ҡыҙ башлы ҡош рәүешендәге диңгеҙ заты.

**СИРЕ́НЬ** [*рус.*] Зәйтүн ағасы һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған шыма ҡуйы йәшел япраҡлы, суҡмарылып торған аҡ йәки күк төҫтәге хуш еҫле сәскәле декоратив ҡыуаҡ. *Ябай сирень. Ҡытай сирене. Фарсы сирене.* ■ *Көҙгө алдына ике йәшкелт оҙонса быяла һауыт ултыртылып, шуға һыу тултырылған, сирень ботаҡтары ҡуйылған.* Ғ. Хәйри. *Тышта сирень сәскәләнә, тирәгә хуш еҫ түгеп.* Т. Арслан.

**СИРЕҮ** [1] *и. иҫк.* Ойошҡан хәрби халыҡ төркөмө; ғәскәр. *Сиреү хеҙмәте.* ■ *Кириллов һанат ҙур сиреү менән беҙҙең тарафтарға сәфәр*

*сыккан.* Ғ. Ибраһимов. *Борон башкорт олатайҙары Мәскәү батшаһына буйһонғас, башкорттарҙан да сиреү хеҙмәтенә яу алғандар.* М. Буранғолов.

♦ **Кырым сиреүе** күмәк халык.

**СИРЕҮ**[2] *к. диал. кар.* **тиреү** 1. *Муйыл сиреү.*

**СИРКӘНДЕРЕҮ** *к.* **1.** *кар.* **сиркандарыу** 1.

**2.** *кар.* **сикәндереү.** *Үлән ысыкланған, тәнде сиркәндерә.* Д. Юлтый.

**СИРКӘНЕҮ** *к.* **1.** *кар.* **сирканыу** 1. *Бай сиркәнеп кулын артка йәшерҙе.* Я. Хамматов.

**2.** *кар.* **сикәнеү** 1. *Һиҫкәнә йән, сиркәнә тән һәм сымырлай аркалар.* Ш. Бабич.

**СИРКӘҮ** [*рус.* церковь] *и.* **1.** Христиан динен тоткан кешеләрҙең дин һәм дини йола уртаклығы менән берләшкән ойошмаһы. *Православ сиркәү. Католиктар сиркәүе. Сиркәүҙе дәүләттән айырыу.* ■ *Казна, сиркәү, монастырь, алпауыттар .. кулынан ер тамам алынды.* Ғ. Ғисмәти.

**2.** Христиан динендәге кешеләрҙең ғибәҙәт йорто. *Сиркәү башы. Сиркәү старостаһы.* ■ *Беҙ юк иттек сиркәү, мәсеттәрҙе, бар иҫкенең тамырын куптарҙык.* М. Хәй.

**СИРКАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Әшәкелеге, бысраклығы һ. б. менән күңелде тартындырыу, ытырғандырыу, ерәндереү.— *Ғилемдар ағай, үтенеп һорайым, зинһар өсөн, минең бисәне тыныс калдырайык әле, шундай сакта аламалык тураһында уйларға ла сиркандыра.* Д. Исламов.

**2.** *эйһ. ф. кар.* **сирканыу** 1.

**3.** *кар.* **сикәндереү.** *Төн һалкыны шинель яғаларынан инеп, [кыҙылармеецтарҙың] аркаларын сиркандыра.* А. Таһиров. *Көндәр йонсоу. Кайҙа коштар осоу, сиркандыра елдәр тәндәрҙе.* Р. Бикбаев.

**СИРКАНЫС** *с.* **1.** Ерәнеү, ытырғаныу тойғоһо уяткан; ерәнес. *Тәфкилев беҙҙең тарихта сирканыс, мәлгүн нәсәп.* Ш. Бабич. *Был сирканыс вакиғаны хатта мөмкин түгел төштә күреү ҙә.* К. Бакиров.

**2.** *кар.* **сикәнес** 1. *Сирканыс һыу. Сирканыс һыуык.*

**СИРКАНЫУ** *к.* **1.** Әшәкенән, бысрактан күңел тартыныу; ытырғаныу, ерәнеү. *Артабан шағир әҫәрҙең буйынан-буйына был исемде .. телгә алмай, исемен атамай һөйләй, телгә алырға ла сиркана.* Р. Бикбаев. *Тимер һаҫык аракы еҫенән сирканып артка тайшанды.* Б. Бикбай.

**2.** *кар.* **сикәнеү** 1. *Шәрәф күптән уянған булһа ла, иртәнге һалкындан сирканып, тормай ята ине.* Б. Бикбай.

**СИРЛЕ** *с.* **1.** Ниндәйҙер бер эске ағзаһында сире булған. *Сирле кеше.* ■ *Бешмә йокмаһын өсөн сирле хайуандың һөтөн һис тә кайнатмай эсергә ярамай.* В. Ғүмәров. *Бөгөн уның сирле күкрәгенә үлем асыуҙары йыйылған.* Д. Юлтый.

**2.** Боҙолған, серегән ере булған. *Сирле ағас. Сирле картуф.*

● *Сирлегә сей икмәк.* Мәкәл.

**СИРЛӘТЕҮ** *к.* Сирле (1 мәғ.) итеү. *Башкайыма кайғы төштө тип, йәш йөрәккәйемде сирләтмә* (Халык йырынан).

**СИРЛӘҮ** *к.* **1.** Ниндәйҙер сирҙән ауырыу. *Һыуык алдырып, үпкәһе сирләгән.* ■ *Бешмә менән мал ғына түгел, кеше лә сирләргә ихтимал. Ул сирле малдан йоға.* В. Ғүмәров.

**2.** Сире (2 мәғ.), серек, боҙок ере булыу. *Алмағастар сирләй — корт төшкән.*

**СИРЛӘШКӘ** *с.* Ауырыуға бирешкән, йыш ауырыған. *Сирләшкә бала.*

**СИРМЕШ** *и. һөйл.* Мари. *Сирмеш кешеһе.*

**СИРОП** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Шәкәр иретмәһенең һыуҙа йәки емеш-еләк һутында куйыртылған бер төрө. *Йөҙөм сиробы. Емеш-еләк сиробы. Карағат сиробы. Һыуҙы сироп менән тәмләү.*

**СИРРИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Серле. *Хак тәғәлә бирһен уға йәннәт сирри хурҙарын* (Бәйеттән).

**СИРСА** *и.* Теш ите. *Сирса боҙолоу. Тешемдең сирсаһы шешкән.*

**СИР-СИРПӘТ** *и. йыйн.* Һәр төрлө сир, ауырыу.

**СИР-СЫРХАУ** *и. йыйн.* Һәр төрлө сир, ауырыу; сир-сирпәт. *Тағы ла яҙ. Йән кыуана, ярһый, яңы канат йәйгән кош кеүек. Картлык, кәрһеҙлектәр, сир-сырхауҙар тұҙға яҙған буш һүҙ, төш кеүек.* З. Биишева.

**СИРТЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **сиртеү.**

**СИРТЕҮ** *к.* **1.** Баш бармакка әләктереп бөккән һук йәки урта бармакты капыл ыскындырып, тырнак менән һуғыу. *Башка сиртеү.* ■ *Ғәмилә кәрттә [откас], иренең маңлайына илле тапкыр сиртте, лә, хахылдап көлдө.* Б. Бикбай. *«Үҙеңә күрә биште тап», тип башына сирткәс, балыкты токсайға төшөрөп ебәрҙем.* Н. Мусин. *Акйелек үгеҙҙе мөгөҙөнән тотоп алған да маңлайына сирткән. Үгеҙ үлгән дә куйған* (Әкиәттән).

**2.** Бармак йәки нимәнеңдер осо менән берәй нәмәгә төртөп һуғыу. *Үмәр карттың тәҙрәһен иплән кенә сирттеләр. Ул тертләп китте.* Һ. Дәүләтшина. *Шәриф .. сабатаһының табанын әйләндереп, бармағы менән тык-тык сиртеп караны.* М. Ғафури.

**3.** Музыка коралында уйнап, кылын һуғыу. *Балалайка сиртеү. Гитара сиртеү. Мандолина сиртеү.* ■ *[Ғәли] думбыраның ике кылын сиртте.* А. Таһиров. *Бәҙерниса .. һул кулын биҙрәнең әсенә куйып, уң кулы менән тиртләтеп сиртеп такмак әйтә.* Т. Хәйбуллин. / Остан-остан ғына кимтеп кыркыу. *Мыйыкты сиртеү.*

**4.** *һөйл.* Һыу, шыйыклык өҫтөн урғылтып, төптән еңел генә тибеү. *Сиртеп кенә кайнау.*

**5.** Карпып, кармакка кабыу (балыкка карата). *Юламан карттың .. акыллы карашлы талғын күҙҙәре, әлеккесә, балык сирткәнен түҙемһеҙлек менән көтөп, калкыуыска төбәлмәгән был көндө.* З. Биишева. *Икенсеһе тағы көнләшеп, йәһәт кенә кармак ташланы, һалыу менән сиртә башланы, бер аҙҙан һуң һирпеп ташланы.* Ғ. Амантай. / *күсм.* Кемдер ниндәйҙер хәлдә калыу, килеп кабыу, эләгеү. *Шул вакыт Ғамир килеп инде.— Әһе, сиртте берәү! — тине Байназар.— Сиртмәне шул әле,— тине әле уны-быны аңлап етмәгән Ғамир.* Б. Бикбай.

**6.** Кабығын ярып ашау. *Ул вакытта [1924 йылдарҙа] беҙҙең йәштәге егеттәр кеҫәләренә көнбағыш һалып, сиртеп йөрөргә ярата ине.* С. Агиш. *Сәтләүектәр сиртеп, һикереп уйнай*

*көлтә койроҡ йылғыр тейенең.* А. Игебаев. / Кимереп тишеү, боҙоу. *Иләгемде кисә генә сысҡан сиртеп ҡуйҙы. Бауырһаҡты .. һарҡыт-ҡас, йыуып ҡуймағанмын.* И. Ғиззәтуллин.

**7.** *күсм. һөйл.* Кемдәләр, нимәнеләр ҡулға төшөрөү; эләктереү, урлау. *Кешенең аҡсаһын сиртеү.* ■ — *Ә мин быңа бер ун ете йәшлек ҡыҙҙы сиртергә уйлайым әле. Һине, ҡустым, түйга саҡырырмын.* Б. Хәсән. *Нәгрә орҙоң иҙмә-һен тип бай фәҡирҙең елкәһен, ә үҙең ас елкә-һенән күпме дәүләт сиртәһең.* Ш. Бабич.

**8.** *күсм.* Тейеп ҡуҙғатыу, уятыу (хис-тойғоно). *Ойоп торған тойғоларҙы саҡ ҡына сиртеп китәм.* М. Кәрим. *Күкрәгемдә шатлыҡ сиртеп ҡуйҙы, йәйғор нурҙарына хас булды.* М. Басыров.

**9.** *күсм.* Яйға, ыңғайға килеү.— *Нисек, теге ҡара ҡыҙ сиртмәйме ни?* С. Агиш.

**10.** *диал. ҡар.* **сағыу** 1. *Зажигалка әллә нисә ҡабат сыртылдатып сирткәс кенә саҡ тоҡанды.* Һ. Дәүләтшина.

**11.** *диал. ҡар.* **моронлау** 1. *Сыбар тауыҡтың себештәре сиртә башлаған.*

♦ **[Кемдеңдер] ҡылын сиртеп** (*йәки* **тартып**) **ҡарау** *ҡар.* **ҡыл.** *Үҙемә йәтеш кенә булып тойолған бер фекер килеп тыуғайны. Шуның менән хужаның ҡылын сиртеп ҡарарға булдым.* З. Хисмәтуллин. **Танауға сиртеү** *ҡар.* **танау.** *Ысын артистар тиерһең! Филармонияның ҡайһы бер артистарының танауына сиртә былар.* Ф. Иҫәнғолов. **Күңел ҡылын сиртеү** *ҡар.* **күңел.** *Дәртле күкрәк күкрәүенән сиртте күңелем ҡылдары.* Ғ. Амантай. **Сиртһәң ҡаны сығыр(ға тора)** *ҡар.* **ҡан** [1]. *Тимербай урта кәүҙәле егет, бик таҙа, мускулдары үрелеп-үрелеп тора, сиртһәң ҡаны сығыр.* С. Агиш. **Тырнаҡ менән сиртеү** саҡ ҡына тейеү. *[Ҡасҡындар] яралыларға тырнаҡ менән дә сиртмәгән.* Н. Иҙелбай.

**СИРТЕШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **сиртеү** 1,3.

**СИРТКЕ** *и.,* **ҡапҡан сирткеһе** Ҡапҡандың дуғаһын эләктереп тотоп торған тел.

**СИРТКЕС** *и.* **1.** Атыу ҡоралының пистонға һуғып ут сығара торған өлөшө. *Мылтыҡтың сирткесен тартыу.* ■ *Нигмәтулла .. мылтыҡ сирткесенә баҫыуҙан көскә тыйылып [Нәфисәгә] әйтте: — Мин һине былай ғына үлтермәйәсәк-мен, кәнтәй.* Я. Хамматов.

**2.** *ҡар.* **сиртке.**

**СИРТМӘ** *и.* **1.** Бөккән, баҫҡан һайын һуҙыла һәм кире ҡайта торған һығылмалы нәмә; пружина. *Сәңгелдәк сиртмәһе.* ■ *Әле генә имеп туйған кескәй Йәнеш сиртмә менән өрлөккә беркетелгән сәңгелдәктә, тәпәйҙәрен ике ҡуллап тоторға тырышып, уйнап ята.* З. Биишева. // *Аҡ мендәрҙә аҡ биләүгә биләнеп, бала ята сиртмә бишектә.* А. Игебаев.

**2.** Бер осо ныҡытылып, икенсе осо мәйшелдәп торған таяҡ (төрлө маҡсатта ҡулланыла). *Киле сиртмәһе.*

**3.** Ҡоҙоҡтоң һыу күтәрә торған оҙон һайғауы. *Соҡор аръяғында оҙон сиртмәһенә күнәк тағылған бейек буралы ҡоҙоҡ [бар].* Ә. Вәли.

**4.** Ҡыуғын ағасын йылғаның тәрән яғына йүнәлтер өсөн яр ситенә йөҙҙөрөп ҡуйған бүрәнә кәртә. *Сиртмә ҡуйыу.*

**5.** Йәш ағасты бөгөп, әҙ генә тарткас та ысҡынырлыҡ итеп эләктереп, осона тоҙаҡ ҡуйып яһаған һунар ҡоралы. *Сиртмә ҡороу. Сиртмә менән ҡош тотоу.*

**СИРТМӘК** *и. диал. ҡар.* **ҡалҡыуыс** 1.

**СИРТТЕРЕҮ** *к.* **1.** *йөкм. ҡар.* **сиртеү** 1—4. *Думбыра сирттереү.* ■ *Биби маңлайына сирттереүҙән ҡурҡып-нитеп торманы, малайҙарҙы хайран ҡалдырып, бер һүҙһеҙ уставты ҡабул итте.* Ә. Бикчәнтәев.

**2.** Нимә менәндер ҡапыл һуҡтырыу, ныҡ ҡына ҡағыу. *Ҡыл дилбегәне арҡаһына сирттергәс, кола алаша иренеп кенә ҡуҙғалды.* Ә. Вәли.

**3.** *күсм. һөйл.* Шартына килтереп, оҫта, матур итеп һөйләү. *Гараж ҡарауылсыһы мәҡәл менән генә сирттерә.* И. Абдуллин.

**4.** *күсм. диал. ҡар.* **типтереү** [1]. *Егет сағында ҡыҙҙар менән сирттергән икән үҙе лә.* В. Нафиҡов.

♦ **Эре сирттереү** эре генә һөйләшеү, эре ҡыланыу. *Әсгәт ҡулынан килмәһә лә, эре сирттерергә ярата.* Н. Мусин. *Йәнәшә сығып китәбеҙ, бик эре сирттерәбеҙ.* М. Кәрим.

**СИРФ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Башҡа бер нәмә ҡатнашмаған; тап-таҙа, саф. *1919 йыл Стәрлетамаҡта баҫылған «Башҡортостан хәбәрҙәре» газетаһы ла сирф татарса сыҡты.* Д. Юлтый.

**СИРХУШ** *и. диал. ҡар.* **ауырыу** [2]2.

**СИРЫҠ** *с.* **1.** Сырылып боҙолған. *Сирыҡ йөҙ. Сирыҡ маңлай. Сирыҡ танау.*

**2.** Йөҙө йәнселгән, боҙоҡ. *Сирыҡ балта. Сирыҡ бысаҡ.*

**СИРЫЛДЫРЫУ** *к. ҡар.* **сирылтыу.** *Йөҙҙө сирылдырыу.* ■ *Бара торғас, Сәлмән туҡтаны ла танауын сирылдырып һауаны еҫкәне.* Ә. Вахитов.

**СИРЫЛТЫУ** *к.* **1.** Йыйырсыҡ-йыйырсыҡ итеп йыйырыу; йыйырсыҡлау, сырыу (бит, йөҙҙө). *Маңлайҙы сирылтыу. Ҡашты сирылтыу.* ■ *Полковник ниҙер иҫенә төшөрөргә тырышып, йөҙөн сирылтты.* Я. Хамматов.

**2.** Ваҡ-ваҡ ҡына итеп йыйырыу; йыйырсыҡлау (һыу өҫтөн). *Ел һыу өҫтөн сирылта.*

**СИРЫЛЫУ** *к.* **1.** Йыйырсыҡ-йыйырсыҡ булып боҙолоу; йыйырылыу (бит, йөҙгә ҡарата). *Йөҙ сирыла. Танау сирыла.* / *күсм.* Ризаһыҙлыҡтан йөҙ боҙолоу, сырай һытылыу. *Күҙен ҡыҫып уға [ингән кешегә] ҡараны бабай. Теге кеше сирылып ҡуйҙы.* Ә. Вахитов.

**2.** Йәнселеп, боҙолоу (үткер ҡоралдың йөҙөнә ҡарата). *Балтаң шундай булһын: ташҡа сапҡанда, таш ярылһын, балта сирылмаһын* (Хикәйәттән).

**3.** Ваҡ-ваҡ ҡына булып йыйырылыу; йыйырсыҡланыу (һыу өҫтөнә ҡарата). *Елһеҙ ҙә һыу өҫтө сирылмаҫ, ташһыҙ ҙа орсоҡ әйләнмәҫ* (Халыҡ йырынан).

**СИРЫУ** *к. ҡар.* **сирылтыу.** *Балтаның йөҙөн сирыу. Битте сирыу. Көйөҫ ел һыу өҫтөн сирҙы.* ■ *Гөлгәйшә инәйҙең кәйефе ҡырылды, бензин еҫенә танауын сирҙы.* Ш. Янбаев.

**СИРЫШТЫРЫУ** *к. ҡар.* **сирылтыу** 1. *Битте сирыштырыу.* ■ *Әскәп танауын сирыштырып, кеткелдәп көлдө.* Б. Бикбай.

**СИРЫШЫУ** *к.* **1.** *ҡар.* **сирылыу** 1. *Бит сирышыу. Йыш һабынлап йыуыу .. тиренең майын*

*бөтөрөп, уны киптерә, тиҙерәк сирышыуға килтерә.* В. Ғүмәров.

**2.** *кар.* **йыйырылыу** 2. *Эдиктың салбары теҙ тиңенән мәтегә каткан, һыңар балағы балтырын асып, өҫкә сирышкан.* Б. Бикбай.

**СИРӘМ** *и. диал.* Сиҙәм. *Сирәмдә аунау.* // *Сирәм ер.*

**СИСЕЛДЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **сиселеү** 3. *Был .. кешене тиҙ генә сиселдереп булмай.* И. Ғиззәтуллин.

**СИСЕЛЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **сисеү 1**, 2. *Сиселгән итек. Сиселгән күлдәк. Сиселгән ток. Сиселгән төйөн. Дилбегәне көрмәп бәйләһәң, сиселмәй.* ■ *Эскән кешенең теле лә, акса янсыгы ла тиҙерәк сиселә.* Б. Бикбай.

**2.** *күсм.* Асылы, мәғәнәһе беленеп, асыкланып хәл ителеү. *Каты аптырашта калдырған акса мәсьәләһе аҙырак сиселгәндәй булды.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *күсм.* Уйын, күңелендәген асыу; асылыу. *Вәлиулла менән Ғәлиәкбәр ағай донъя хәлдәрен сиселеп китеп һөйләшә.* Ф. Исәнғолов.

♦ **Тел сиселеү** асылып, һөйләр булыу; һөйләй башлау. *Айсыуак ләм-мим өндәшмәй килә ине, капыл теле сиселде.* Ш. Янбаев.

● *Дуҫ тип сиселмә, дошман тип киҫелмә.* Мәкәл.

**СИСЕНДЕРЕҮ** *к.* Кемдеңдер өҫтөнән кейемен һалдырыу. *Кунакты сисендереү.* ■ *Ишектән килеп инеүселәр менән иҫәнлек-һаулык һорашкан арала ук, Кадир уларҙы ололап, сисендерә башланы.* Б. Бикбай. *Муйылды сисендерә һалып, .. йылы тирегә һалдылар.* Һ. Дәүләтшина.

**СИСЕНДЕРЕШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **сисендереү.**

**СИСЕНЕҮ** *к.* Өҫ кейемен һалыу. *Сисенеп ташлау. Сисенеп ултырыу.* ■ *Кайткас, сисенеп ятһам да, бик оҙак йоклай алманым.* Т. Йәнәби. *Ул [Тимер] тиҙ-тиҙ генә сисенде лә, кейемдәрен туҙҙырып ташлап, шаптырлап һыуға инеп китте.* Б. Бикбай. *Елтерәтеп, төрткөләп таҙҙы алып килгәс береһе, тине хәлфә: «Эй, хоҙай аткан! Сисен, ят, таҙ, пәрей!»* Ш. Бабич.

**СИСЕНЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **сисенеү**. *Сисенешеп ятыу.*

**СИСЕҮ** *к.* **1.** Бәйләнгән ептең, бауҙың остарын тарғатыу. *Төйөндө сисеү.* ■ *Оҙак маташтым, муйындағы төйөндәрҙе систем, актарҙым — күлдәктәрем коро, тик салбарым ғына һыуланған.* Д. Юлтый. / Уратып бәйләнгән, сырмаған ерҙән тарғатыу. *Арканды сисеү. Билгауҙы сисеү.* ■ *Якуп менән Булат .. атты маталаған арканды тиҙ-тиҙ генә сисә һалдылар.* Б. Бикбай. *Йәш килендәр уттай янып, бешеп, алтын көлтәләрҙе сисәләр.* Ғ. Мәсғүт. / Бауын алып, ыскындырыу, асыу йәки тарғатыу. *Токто сисеү. Йөктө сисеү. Сисеп ебәреү.* ■ *[Һалдат:] Рәхмәт һиңә, егет, кулымды систең, кулым сиселгәс, мин бөтәһен дә эшләй алам* (Әкиәттән).

**2.** Кейгән кейемде өҫтән һалыу. *Аякты сисеү. Итекте сисеү. Сисеп ташлау. Сисеп элеү.* ■ *Гөлйөҙөм, эсәләренән кайтып, көпөһөн сисеп, сөйгә элде.* Һ. Дәүләтшина. *Тар бишмәтең сисеп, кайын ботағына элдең һин.* М. Кәрим.

**3.** *күсм.* Эске асылын, мәғәнәһен билдәләп асыклау, хәл итеү. *Кроссворд сисеү. Мәсьәлә сисеү.* ■ *Шакирҙың откорлоғона, бирелгән мәсьәләләрҙе тиҙ сисеүенә укытыусылар ғәжәпләнә ине.* А. Игебаев. *Инде йондоҙҙарҙы әйтәйем сисеп: ул нисә миллион мәләк тишкән тишек.* Ш. Бабич.

**4.** *күсм.* Уйҙа, күңелдә булғанды асыу. *Ниәтте сисеү.* ■ *Беҙҙең Байгужа .. иптәштәргә үҙенең унтер-офицерҙарҙы үлтереү вакиғаһын систе, бөтәһен һөйләп бирҙе.* Д. Юлтый.

♦ **Телде сисеү** асылып китеп, бөтә эсеңдәген һөйләү.

**СИСЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **сисеү** 1—3. *Арифметик мәсьәлә сисешеү. Бауҙы сисешеү. Кейемен сисешеү. Проблеманы сисешеү.*

**СИСКЕН** *с. диал.* **1.** *кар.* **сымыры** 1. *Эшкә сискен кеше.*

**2.** *кар.* **бөхтә** 1. *Сискен катын.*

**СИСТЕ́МА** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** Бер-береһе менән мөнәсәбәттә, бәйләнештә булып, билдәле бер бөтөнлөктө, берҙәмлекте тәшкил иткән элементтар. / Нимәнеңдер өлөштәренең планлы урынлашыуына һәм үҙ-ара бәйләнешенә нигеҙләнгән билдәле бер тәртибе. *Китаптарҙы шкафка система менән куйыу. Системаға килтереү.* / Билдәле эш, тормош шарттарына карата кабул ителгән тәртип. *Абонементтар системаһы. Аттестация системаһы.*

**2.** *зоол., бот.* Классификация, төркөмдәргә бүленеш. *Линнейҙың ботаник системаһы.*

**3.** Ниндәйҙер тәғлимәт нигеҙендә яткан принциптар йыйымы. *Гегелдең философик системаһы. Ушинскийҙың педагогик системаһы.* / Нимәнелер тормошка ашырған ысулдар, хәл иткән юлдар йыйымы. *Туберкулёзды дауалау системаһы. Тәрбиә системаһы. Укытыу системаһы.*

**4.** Дөйөм билдәһе нигеҙендә берләшкән ниндәйҙер элементтар, берәмектәр йыйымы. *Тартынкы өндәр системаһы. Һуҙынкы өндәр системаһы.* ■ *[Сыртланов:] Көн тәртибендә бер генә мәсьәлә: метр системаһындағы үлсәүҙәргә күсеү тураһында доклад.* С. Агиш. / *геол.* Билдәле бер каҙылдык фаунаһы һәм флораһы менән айырылып торған тау токомо катламдары йыйымы. *Пермь системаһы .. палеозой төркөмөнөң өҫкө системаһын тәшкил итә. Ул ике бүлектән: аҫкы һәм өҫкө пермдән тора.* К. Тимергазин.

**5.** Үҙ-ара бәйләнгән өлөштәрҙең берҙәмлеген тәшкил иткән королош, структура. *Кан тамырҙары системаһы. Кояш системаһы. Телдең грамматик системаһы. Үҫемлектең тамыр системаһы.* ■ *Тел күренештәрен тикшергәндә бер системалағы кәрҙәш телдәрҙе генә түгел, ә территория яғынан бер-береһенә якын булған, ләкин бүтән системаға ингән телдәрҙе лә белергә кәрәк.* Ғ. Сәйетбатталов. / Ойошма булып берләшкән хужалык, идара һ. б. структур берәмектәр йыйымы. *Сауҙа системаһы. Халык мәғарифы системаһы. Һаулык һаклау системаһы.* ■ *Хужалык системаһын тамырынан үҙгәртмәйенсә, .. эффектлы һәм һығылмалы идара итеү системаһын булдырмайынса тороп, экономикалағы яңы бурыстарҙы хәл итеү мөмкин түгел.*

«Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль. / Бер маҡсатка хеҙмәт иткән төрлө ҡоралмалдар берләшмәһен тәшкил иткән техник ҡоролма. *Йылытыу системаһы. Пар системаһы. Телеметрик система. Һуғарыу системаһы. Энергетика системаһы.*

**6.** Эштәге, тормоштағы берәй нәмәнең ҡоролоу, ойошторолоу формаһы, ысулы. *Премиаль система. Ике палаталы парламент системаһы. Һайлау системаһы. Хужалыҡтың барщина системаһы.* / Ижтимағи ҡоролош формаһы. *Капиталистик система. Социалистик система. Дәүләт системаһы.* / Техник төҙөлөш формаһы. *Наган системаһындағы револьвер.* ■ *«Платта», «нартруб» системаларындағы яҡшы яңы станоктар .. бер артҡа, бер алға йөрөп, өҙлөкһөҙ шаулап эшләп тора.* Ш. Шәһәр.

♦ **Йылғалар системаһы** 1) үҙенең ҡушылдыҡтары менән ҙур йылға; 2) ниндәйҙер илдең, урындың, донъя өлөшөнөң йылғалары.

**СИСТЕМАЛАШТЫРЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **системалаштырыу.**

**СИСТЕМАЛАШТЫРЫУ** *к.* Системаға (1—4 мәғ.) һалыу, тәртипкә килтереү. *Белемде системалаштырыу. Изотоптарҙы системалаштырыу. Өндәрҙе системалаштырып биреү.*

**СИСТЕМАЛЫ** *с.* **1.** Эҙмә-эҙлекле, билдәле тәртиптәге. *Системалы күренеш.* / *Сит телде системалы өйрәнеү. Системалы белем алыу.* ■ *[Күнекмәләрҙе] системалы рәүештә алып барырға [кәрәк икәнен] иҫтән сығарырға ярамай.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1969, № 5.

**2.** Системаға (1 мәғ.) нигеҙләнгән, системаға таянған. *Системалы анализ. // Системалы планлаштырыу. Системалы тикшереү.*

**СИСТЕМА́ТИК** [*рус.*] *и.* Систематика (2 мәғ.) буйынса белгес.

**СИСТЕМА́ТИКА** [*рус.*] *и.* **1.** *махс.* Нәмә, күренештәрҙең төркөмләнеше, кластарға бүленеше. *Изотоптар систематикаһы. Кристалдар систематикаһы.*

**2.** Бөтә тере һәм үлеп бөткән хайуан, үҫемлектәрҙе төрө, сығышы, ғаиләһе һ. б. буйынса һүрәтләү һәм классификациялау менән шөғөлләнгән фән. *Үҫемлектәр систематикаһы. Хайуандар систематикаһы.*

**СИСТЕМАҺЫҘ** *с.* Бер ниндәй системаға (1 мәғ.) нигеҙләнмәгән, таянмаған. *Системаһыҙ эш. Системаһыҙ рәүештә планлаштырыу. // Системаһыҙ тикшереү.*

**СИСТЕРЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **сисеү** 1—3. *Арҡанды систереү. Бүреген систереү. Күлдәген систереү.*

**СИТ** [1] *и.* **1.** Нимәнеңдер барып бөткән ере, сиге. *Ауыл ситe. Ашъяулыҡ сите. Йылға сите. Өҫтәл сите. Ситтәге урын. Урындыҡ сите. Һыу сите. Юл сите. Яр сите.* ■ *Ауыл осондағы быуа ситендә ҡаҙ бәпкәләре менән бергә бала-саға супырлашып һыу инә.* Ш. Янбаев. *Ҡала буйлап йөрөй торғас, мин уның төньяҡ ситенә килеп сыҡтым.* Ғ. Әмири.— *Анау бер көнө суҡынған Хәмди еңгәм .. табамдың бер .. ситен китеп алып килеп бирҙе.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Торған ерҙән, урындан бер аҙ ҡырҙа булған яҡын урын. *Ситкә һалыу. Ситкә ултырыу. Ситтә тороу. Юлдан ситкә сығыу.* ■ *Ямал Йомаголдо беләгенән тартҡылап, бер яҡ ситкә алып сыҡты.* М. Тажи. / Төп тарафҡа, йүнәлешкә ҡырын яҡ; ҡыр. *Башты ситкә бороу. Ситкә ҡарау. Ситкә тайшаныу.* ■ *Уның [Әхмәттең] аҫтындағы аты зирәк, юлдан ситкә сыҡмай, һаман алға саба.* И. Көҫәпҡол. *Ҡыҙ минән ерәнгән һымаҡ итеп битен ситкә бора биреп, сырайын һытып, миңә күҙенең ағы менән ҡарап ҡуйҙы.* Т. Йәнәби.

**3.** Тыуған, торған төйәктән ҡырҙа булған алыҫ урын; ят ер. *Ситкә ебәреү. Ситтә йәшәү. Ситкә китеү.* ■ *Байтаҡ йылдар ситтә йөрөп ҡайтһа ла, йәш ваҡытында йыш үтергә тура килгәнлектән, йәйләү юлы яҡшы таныш ине Карамға.* Н. Мусин. *Мулла миңә харам талаҡ ҡылғанына үкенгән. .. Һарысәс ситкә китер, тип бик ҡурҡҡан.* М. Буранғолов. *Аҫыл да аҫыл ҡыҙҙарҙы ҡол итеп ситкә ҡыуҙылар.* Салауат Юлаев.

**4.** Туған-ырыуҙан булмаған кеше; ят. *Сит йорто. Сит малы.* ■ *Күп тә үтмәй, беҙҙең ергә ситтәр ҡул һуҙа. Оло улдарын тәүҙә оҙата Шәмсиә.* Ә. Вахитов. *Ситтәр яуы ябырылғанда эймәгән башын халыҡ.* Р. Нигмәти.

♦ **Күҙ сите менән ҡарау** *шул уҡ* **күҙ ҡойроғо менән ҡарау** *ҡар.* **күҙ. Ситкә ҡағыу** 1) үҙ итмәй ситләтеү. *Ҡәйнәһен ул сағып тора, гелән ситкә ҡағып тора.* Т. Арслан; 2) риза булмай ҡаршы төшөү; кире ҡағыу. *Тәкдимде ситкә ҡағыу.* **Ситкә ҡуйыу** иғтибарҙан, бурыстан сығарыу. *[Ислам:] Хөкүмәттең үтенесен ситкә ҡуйып булмай.* Д. Юлтый. **Ситкә тайыу** ҡайҙалыр олағыу, ҡасыу. **Ситкә тибеү** *ҡар.* **ситкә ҡағыу. Ситтә ҡалыу** ниҙмәгәлер йәлеп ителмәй ҡалыу. *Мәктәптән ситтә ҡалған балалар.* **Ситтән уратыу** туптура әйтмәй, башҡа һүҙҙәрҙән башлап, кинәйәләп килтереү. *[Биктимер] уның [атаһының] әргәһенә .. ятты ла, ситтән уратып һүҙ башланы.* Ф. Иҫәнғолов. **Ситтә торһон** кемде йәки нимәнелер юғары ҡуйып маҡтағанда әйтелә. *Минең Хафизаның йырлағанын ишетһәң — артистарың ситтә торһон.* С. Агиш.

● *Илашыуға үҙ яҡшы, һыйлашыуға сит яҡшы.* Мәҡәл.

**СИТ** [2] *с.* **1.** Яҡынлыҡ мөнәсәбәттәре менән бәйләнмәгән. *Сит кеше. Бер-береһенә сит халыҡ.* ■ *Улар [башҡалар] үҙ түгелдәр, сөнки улар ситтеке, сит малы, сит әйбере.* Ш. Бабич.

**2.** Кемдең дә булһа тыуған йәки һәр ваҡыт йәшәгән ере булып һаналмаған. *Сит ил.* ■ *[Ҡатын:] Сит ергә китеп үлгәнсе, үҙ йортомда үләм.* Д. Юлтый. / Башҡа дәүләткә, илгә йәки бүтән халыҡҡа ҡараған, бәйләнешле. *Сит йолалар. Сит тел.* ■ *Үҙемде әллә ниндәй бөтөнләй бер сит донъяға килеп ингән кеүек һиҙҙем, .. бер төрлө рәхәтләнеп һөйләшер кеше булмаҫ кеүек тойолдо.* С. Агиш.

**СИТАЙ** *с.* Сеп-сей ҡыҙыл (тәнгә ҡарата). *[Хаят:] Бәләкәй әсәй, ул әле мине, мишәр турғайы, ситай, һары баш, тип әрләне.* Һ. Дәүләтшина.

**СИТАЙЫУ** *к. ҡар.* **ситәйеү.** *Ситайып торған күҙ.*

**СИТАҠА** *с. диал.* Яланғас. *Минең өҫтәге кейемдән әсәйемдең тырышлығы арҡаһында ғына ситаҡа тән күренмәй.* Ш. Янбаев.

**СИТЕК** *и.* Йоҡа күндән тегелгән йомшаҡ табанлы, оҙон ҡуныслы үксәһеҙ итек (калуш ҡата менән кейелгән). *Ҡыҙыллы ситек. Сәмсәле ситек. Ситек ҡуныҫы.* ■ *Ғәйниямал инәй .. ҡулаҡ ҡыҙҙарына биҙәкләп ситек теккән.* Ф. Рәхимғолова.

**СИТЕЛЕҮ** *к. диал.* Ситләшеү. *Сителгәнде ситкә һелтәү. Туғандарҙан сителеү.*

**СИТКЕ** *с.* Бер яҡ ситтә булған; ситтәге. *Командир беҙгә артҡа ҡалырға ымланы. Үҙе иң ситке бер ҡыуаҡ төбөнә шыуып барып оҙаҡ ҡына ҡарап ятты.* Ф. Иҫәнғолов. *[Рәхимә:] Урталағы тирмәлә ҡарттар, муллалар булыр. Ситкеһендә ҡатын-ҡыҙ ултырыр.* Һ. Дәүләтшина.

**СИТ-ҠЫРЫЙҺЫҘ** *с. диал. кар.* **икһеҙ-сикһеҙ** 1. *Сит-ҡырыйһыҙ сахра кеүек майҙан ине [һарай].* Ш. Бабич.

**СИТЛЕК** *и.* **1.** Ҡош, йәнлек бикләү өсөн арҡыры-буй тимер тотоп яһаған оя йәки ҡоролма. *Ситлеккә ябыу. Ситлектә тотоу. Ситлектәге арыҫлан. Ситлектән сығарыу.* ■ *Яҙғы көндөң яҡты байрамында ситлектән ул коштар осорған.* М. Хәй. **Ситлектәге ҡош кеүек** ирекһеҙ кешегә ҡарата әйтелә. *Сәлимә, .. ситлектәге ҡош кеүек, зарыға башланы.* З. Биишева. **Ситлектән ҡотолған ҡош кеүек** иреккә, иркенлеккә сыҡҡан кешегә ҡарата әйтелә. *Ул [Ямал], ситлектән ҡотолған ҡош кеүек, .. уйнай, көлә, шаяра.* М. Тажи. / Айырған күстең инәһен ябыр өсөн яһалған шул формалағы бәләкәй генә оя. *Атайым .. ҡорт инәһенә йүкә ағасынан ситлек эшләп ултыра ине.* Н. Мусин.

**2.** *күсм.* Тотҡон, ирекһеҙ хәл. *Халыҡтың күңеле, рухы ситлектә саҡта, уға донъяның киңлеге күренмәне.* М. Кәрим.

♦ **Күкрәк ситлеге** күкрәктең ҡабырға һәм түш һөйәге менән сикләнгән өлөшө.

**СИТЛӘТЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **ситләтеү** 3. *Ситләтелгән кеше. Эштән ситләтелеү.*

**СИТЛӘТЕҮ** *к.* **1.** Нимәнеңдер ситенән (1 мәғ.) буйлатыу. *Урындыҡ ситләтеп ултыртыу. Яр ситләтеп алып барыу.* ■ *Өй ситенән ситләтеп ҡалған исемдәр ҡалдылар.* Ш. Бабич.

**2.** Ситтән[1] (2 мәғ.) уратыу. *Ситләтеп үтеү.* ■ *Ана бер ҡыҫҡа ҡойроҡ [ҡуян] күренде. Быныһы ла алыҫ. Нимә булды һуң һеҙгә? Ниңә мине ситләтеп үтәһегеҙ?* Ф. Әсәнов.

**3.** Сит[1] (1 мәғ.) күреү, үҙ итмәй ҡыйырһытыу. *Таңатарҙың табындар менән дуҫлашыуын ҡатайҙар яратмаған, .. көлгәндәр, ситләткәндәр.* Ә. Вахитов. *[Шәүәли:] Барыһын атайың хаҡына эшләйем, .. яҡшы кеше ине ул: үҙе лә йәшәй белде, башҡаларҙы ла ситләтмәне.* Б. Бикбай.

**4.** *күсм.* Ниндәй ҙә булһа эштән, урындан бушатыу. *Етәкселектән ситләтеү. Эштән ситләтеү.*

**5.** *күсм.* Кинәйәләп, уратып килтереп ишара яһау. *Хакмулла .. ситләтеп-ниҙеп торманы, тейешлеһен генә ярып әйтте.* Ҡ. Сафин.

**СИТЛӘҮ** *к.* **1.** Нимәнеңдер ситенән[1] (1 мәғ.) буйлау. *Яр ситләп барыу.* ■ *Айбулат кейеҙ ситләп ҡырын ятҡан урынынан ҡуҙғалманы.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Сит[1] (2 мәғ.) яҡтан уратыу, тирәһенән, ситенән урау. *Төлкө ҡапҡанды ситләп үтеп киткән.* М. Тажи. *Ерем тағы бер ҡат елеп сыҡты, Ҡояш ситләп һалған һукмағын.* Ғ. Дәүләтов.

**3.** *күсм.* Яҡынлыҡты танымау, үҙ итмәү; иҫәпләшмәү. *[Рәхимә:] Бүре һымаҡ аҫтан ҡарап, ситләп йөрөргә, беҙ унын [Айбулаттың] атаһын үлтергәнме?* Һ. Дәүләтшина. *[Исмәгил:] Ҡара әле, Сәлим, һин ниңә минән ситләп йөрөйһөң?* С. Агиш. *Әхирәттәре Фатиманан ситләне, уға .. ҡурҡыулы ҡараш ташлар булды.* Ж. Кейекбаев.

**4.** *күсм.* Ниндәйҙер мәсьәләгә ҡағылмай, туҡталмай урау. *[Гәрәй] күп нәмәне йәшермәне, тик үҙенә тап төшөрә торған урындарҙы ғына ситләп үтеп, бар күргәндәрен һөйләп сыҡты.* Б. Бикбай.

**5.** *күсм.* Ситкә тайпылыу, алыҫлашыу.— *Беҙ бында мәсьәләнән ситләберәк киттек.* Ш. Насыров.

**СИТЛӘШЕҮ** *к.* **1.** Ситкә [1](1,2 мәғ.) йүнәлеү; алыҫлашыу. *Пароход мыҙылып ҡына ярҙан ситләшә башланы.* М. Тажи. *Халыҡтың һирпмәһен һиҙгәс, эштең бөтөнләй башҡа төҫ ала башлағанын күргәс, секретары менән зильский аҡрынлап ҡына ситләшә башланылар.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *күсм.* Ниндәйҙер мәсьәләгә ҡағылмай ситләп үтеү, иғтибар итмәү.

**3.** *күсм.* Яҡын мөнәсәбәтте өҙөү, ситкә тайпылыу; алыҫлашыу. *[Рәхим:] Эйе, эйе, көндән-көн ситләшәһең, минең һиңә булған ҡарашымды һаңға һукмайһың.* Н. Нәжми. *Ғәббәстең дуҫиштәре лә ситләшеп бөттө хәҙер; хатта әшнәләренән дә күрмәй инде ул кәҙер.* А. Игебаев.

**СИТЛӘШТЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **ситләшеү** 2, 3. *Туғанлыҡ мөнәсәбәтенән ситләштереү. Тәрбиә эшенән ситләштереү.*

**СИТРО́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Алкоголһеҙ емеш һыуы. *Ситро эсеү.*

**СИТСА** [*рус.* ситец ⟨ *гол.*] *и.* Ябай бер төҫлө йәки биҙәкле еңел кизе-мамыҡ туҡыма. *Биҙәкле ситса. Йомшаҡ ситса. Төҫһөҙ ситса. // Ситса күлдәк.*

**СИТУА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ниндәйҙер шартта барлыҡҡа килгән бер төрлө хәл йәки мөнәсәбәт. *Политик ситуация. Революцион ситуация. Халыҡ-ара ситуация.*

**СИТҺЕНДЕРЕҮ** *к. кар.* **ситләтеү** 3. *Оло ағаларының бәҙзеһе ҡарсыға алды, Заятүләкте ситһендереп, уға ябалаҡ балаһы кеүек бер аҡ ҡош балаһы бирҙеләр.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**СИТҺЕНЕҮ** *к.* Кемделер сит[1] (1 мәғ.) итеп, ят итеп күреү. *Әле һаман мәктәпкә лә, мөғәлимәгә лә ылыға алмаған Емеш был көнө айырата ситһенеп ултырҙы.* З. Биишева. *Аллаяр атаһын ситһенеп, ҡырыҫ булып үҫә. Әптелгәлим бала иркәләүҙең нимә икәнен дә белмәй.* Ф. Иҫәнғолов.

**СИТЫҠ** *с. кар.* **ситай.** *Ситыҡ йөҙ.*

**СИТӘЙЕҮ** *к.* Ҡып-ҡыҙыл булып сейләнеү. *Ситәйгән күҙ. Ситәйеп торған яра.*

**СИТӘН** *и.* **1.** Талдан, сыбыҡтан үреп эшләнгән кәртә. *Ситән буйы. Ситән ҡаҙығы. Ситән аша сығыу. Ситән үреү. // Ситән келәт. Ситән кәртә.* ■ *Ҡойма аша төшкәндә, [Ямал] ситән ҡаҙығына эләктереп [күлдәген] йыртҡырған.* М. Та-

жи. *Ситән үрер алдынан атайым .. осло ҡаҙыҡтарҙы теҙеп ултыртып сыға.* Ә. Әхмәтҡужин.

**2.** Талдан, сыбыҡтан үреп эшләнгән төрлө нәмә. *Ҡырандас ситәне. Йөк ситәне. // Ситән аҙбар.* ■ *[Беҙ] гүмер буйы бәләкәй тәҙрәле, ярыҡтарынан ел үйнап торған ситән өйҙән сыға алманыҡ.* И. Насыри.

**СИТӘНЛӘҮ** *ҡ.* Ситән (1 мәғ.) менән уратыу, ситән тотоу. *Төтөндәрҙән ҡүренә ваҡ өйҙәр, ситәнләгән уның тирәһен.* Ғ. Амантай.

**СИТӘҮКӘ** *и.* **1.** Төрлө маҡсат өсөн ауыҙын тар, төбөн киң итеп сыбыҡтан үргән һауыт. *Ҡорот ситәүкәһе. Шешә ситәүкәһе.* ■ *Хужа ҡыҙҙы ситәүкә эсенә ултыртып ҡуйҙы, ти* (Әкиәттән).

**2.** Бүре тотор өсөн ике ҡат ситәндән түңәрәкләп яһаған кәртә (алдатыр өсөн эсенә кәзә, бәрәс ҡуйыла).

**СИТ-ЯТ** *с.* Бөтөнләй сит, шыпа ят. *Сит-ят яҡтарға юлыҡҡан кешеләр тыуған илен, ерен ҡайтып күреүҙе ысын мәғәнәһендә оло бәхет тип иҫәпләгән.* Р. Бикбаев. *Ялбыр йөнлө Алабай, .. сит-ят кеше килә ҡалһа, һаулап сығып абалай.* Ғ. Амантай.

**СИФАТ** [1] [*ғәр.*] *и.* **1.** Кемдең йәки нимәнеңдер асылын билдәләгән үҙенсәлек. *Кире сифат. Ыңғай сифат. Кешелек сифаты.* ■ *Шәһит Хоҙайбирҙиндың матур сифаттары минең күңелемдә һис бер ваҡытта ла юйылмаҫ эҙ ҡалдырҙы.* М. Ғафури. *Партиялылыҡ, югары идеялылыҡ, патриотизм һәм пролетар интернационализм — был сифаттар Амантай шиғырҙарының барыһы өсөн дә хас.* Ғ. Зөлҡәрнәйев.

**2.** Нәмәнең яҡшылыҡ, яраҡлыҡ дәрәжәһе. *Сифат күрһәткесе. Аҙыҡтың сифаты. Тауарҙың сифаты. Кадрҙарҙың теоретик әҙерлек сифаты. Уҡытыуҙың сифаты. Эштең сифаты. Сифатты юғалтыу. Сәсеүҙең сифатын тикшереү. Эштең сифатын күтәреү.* ■ *[Дауытов — Байназарға:] Сифат яғы нисек, сифат? Унда һеҙ, тиҙерәк рапорт бирергә мауығып, баҫыу буйынса сабып ҡына сыҡманығыҙмы?* Б. Бикбай.

**3.** Кешене кеше, нәмәне нәмә иткән тышҡы һүрәт; ҡиәфәт, килеш-килбәт. *[Ғабдрахман мулла:] Юха булдымы, инде ул төрлө сифатҡа керә. Теләһә матур ҡыҙ була ла егеттәр янына бара, теләһә матур егет була.* И. Насыри. *Сифатыңды тәүсиф итәм, Өмөгөлсөм, үҙәгенә былбыл кергән тере гөлһөң.* Ш. Бабич.

**4.** *филос.* Нәмәнең, күренештең төп үҙенсәлектәрен эсенә алған билдә. *Сифат үҙгәреше. Һандың сифатҡа күсеүе.*

♦ **Сифатында** вазифаһында, урынында. *Таһиров Афзал полк комиссары сифатында граждандар һуғышында ҡатнаша.* Ә. Вахитов.

**СИФАТ** [2] [*ғәр.*] *и. грам.* Нәмәнең ниндәй зә булһа бер билдәһен белдергән һүҙ һәм уларҙы эсенә алған һүҙ төркөмө. *Ҡушма сифат. Төп сифат. Шартлы сифат. Яһалма сифат дәрәжәләре.*

♦ **Сифат ҡылым** исемдең эшен, хәрәкәтен, билдәһен белдергән ҡылым төрө. *Киләсәк заман сифат ҡылым. Хәҙерге заман сифат ҡылым. Үткән заман сифат ҡылым.*

**СИФАТЛАУ** *ҡ.* Нимәнеңдер үҙенсәлекле билдәләрен, һыҙаттарын күрһәтеү; һүрәтләү. *Етәксенең эш стилен сифатлау. Эшсене эш урынында сифатлау.*

**СИФАТЛЫ** *с.* **1.** Ниндәйҙер сифатҡа эйә булған. *Түбән сифатлы. Юғары сифатлы.*

**2.** Яҡшы сифатҡа эйә булған, сифаты юғары. *Сифатлы тауар. Сифатлы итеп эшләү. Сифатлы орлоҡ сәсеү. // Эште сифатлы башҡарыу. Юл сифатлы төҙөлгән.* ■ *Баҫыуҙар көҙҙән үк сифатлы итеп туңға һөрөлгән.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 14 март. *Хәйерсе ҡарт юлда бер нәмә таба, ул шул тиклем сифатлы була* (Әкиәттән).

**СИФАТҺЫҘ** *с.* Насар сифатлы, сифаты түбән. Сифатһыҙ тауар. Сифатһыҙ итеп эшләү. // *Сифатһыҙ башҡарылған эш.*

**СИФИЛИС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Йоғошло венерик ауырыу.

**СИФИЛИТИК** [*рус.*] *и. һөйл.* Сифилис менән ауырыған кеше.

**СИФИЛИТИК** *с.* **1.** Сифилисҡа хас; сифилис тыуҙырған. *Сифилитик сәбертмә. Сифилитик үпкә ауырыуы.*

**2.** Сифилис менән ауырыған. *Сифилитик ауырыу.*

**СИФОН** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Юғарғы һауыттың ауыҙы аша түбәнгеһенә шыйыҡлыҡ ағыҙа торған төрлө оҙонлоҡтағы быуындарҙан ғибәрәт кәкре көпшә. *Ер һуғарыу сифоны.*

**2.** Газлы һыу әҙерләү һәм һаҡлау өсөн шундай көпшә ҡуйып эшләнгән һауыт. *[Өлтәфиә — Йыһанурға:] Бынауһын, моғайын, һин алйот сәй термосы тип уйлайһыңдыр әле. Булмай торһон. Ул .. сифон тип атала. Газланған һыу эсәм тип, хәҙер әллә ҡайҙа барып, сиратҡа тороп йөрөйһө юҡ.* С. Кулибай.

**3.** Паровоз мейесендә тартыуҙы көсәйтә торған прибор.

**СИХРИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Сихырға (1 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Сихри эш.* ■ *Әйләнәмдә әйләнеп сыҡты, сихырлап, көлгөләп, ғүйә һыҙҙы әйләнәмдә сихри йәндән дуңгәләк.* Ш. Бабич.

**2.** *күсм.* Күңелде арбап иретерлек; һоҡланғыс. *Сихри донъя. Сихри матурлыҡ. Сихри кис. Сихри моң. Сихри нур. Сихри тынлыҡ.* ■ *Аҫыл таштар кеүек сихри нур менән һуғарылған был аҫәрҙәр [Шекспир аҫәрҙәре] донъялағы иң ҙур аҡыл эйәләрен дә хайран ҡалдырған.* Ш. Янбаев. *Һин, булмаһа, бесән өҫтөндә кил — йылдың ул иң сихри бер мәле.* Н. Нәжми.

**СИХРИӘТЛЕ** *с. ҡар.* **сихри** 1. *Тыуған өйөм, ерем! Ниндәй, ниндәй сихриәтле көскә эйәһең!* Т. Ҡарамышева.

**СИХУТ** [*рус.* чахотка] *и. һөйл.* Махсус микроб тыуҙырған, үпкәне зарарлаған йоғошло ауырыу. *Сихут булыу. Сихутҡа әйләнеү.* ■ *[Фәхри:] Хәтерегеҙҙәлер әле, былтыр Гәрәй ҡулаҡтың бер төптән өс быҙауы үлде бит, бысраҡ һауыттан ашатҡан, сихут булғандар.* Б. Бикбай. **Ҡоро сихут** һалҡын тейеп, ҡаҡырыҡһыҙ йүткертә торған үпкә, тамаҡ ауырыуы.

**СИХХӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һаулыҡ. *Ағзаларыма сиххәт вә ләззәт бирҙең.* М. Өмөтбаев.

**СИХЫР** [*гәр.*] *и.* **1.** Иҫке хөрәфәтсә, им менән кешегә йәки тәбиғәткә үҙең теләгәнсә тәьҫир итеү ысулы. *Сихыр белеү. Сихыр өйрәнеү.* ■ — *Өшкөртөп эсергәндәр, кыҙыңдың сәсен кыркып алып, .. төпһаңа күмгәндәр, ти. Сихыр гәләмәте, күрәләтә сихыр гәләмәте, ти.* Һ. Дәүләтшина. *Вә ләкин шайтан корған сихыр менән күл икегә бүленгән уртаһынан.* Ш. Бабич. / Шул ысул менән барлыкка килтерелгән хәл. *Сихыр кайтарыу, иренән катынды һөйҙөрөү, бала тапмаған катындан бала таптырыу кеүек эштәр Балтабикәне төрлө ауылдарға йөрөтә.* Д. Юлтый. *Һарғайып кибеүенең бер сере барҙыр, сихырлаткандарҙыр, тип, Көнһылыуҙы сихыр кайтарыусыға алып баргандар* (Хикәйәттән).

**2.** *күсм.* Күңелде арбап иретерлек, һокланғыс сифат.

**СИХЫР-ЗӘХМӘТ** *и. йыйн.* Һәр төрлө ауырыу. *Мулла уны эш-мәшә килеп сихыр-зәхмәттән өшкөрҙө, доғаларын укыны.* «Ағиҙел», 1963, № 9.

**СИХЫРЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **сихырлау.** *Сихырланған кеше. Сихырланған нәмә. Ғишык уты менән сихырланыу.* ■ *Тәбиғәттең матурлығы, моңо аҫтында йоклай алмай ята инем сихырланып.* Д. Юлтый.

**СИХЫРЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **сихырлау 1.** *Бер еңгә тейеш бисә Шәүрә өҫтөнән был егеткә барам тип йөрөй. Әллә шул сихырлатты микән тип, [әсәһе] сихырсылар сакыртып, сихыр кайтарырға күп мал түгә.* М. Буранғолов.

**СИХЫРЛАУ** *к.* **1.** Сихыр (1 мәғ.) менән боҙоу. *[Мөйыл:] «Әллә балакайымды сихырланылармы икән? Моғайын, йә өшкөрөп эсергәндәрҙер, йә шәлкем сәсен кыркып алып, төпһаға күмгәндәрҙер.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Кешене һокланғыс бер сифаты менән арбау, үҙенә тартыу. *Караған кешене сихырлай торған был кара каштарға миҫал килтереүе бик ауыр.* М. Ғафури. *[Ғафур:] Зифа минең йөрәгемде, тойғоларымды үҙенә тартты, сихырлаған-дай итте.* Ғ. Ғәйнуллин.

**СИХЫРЛЫ** *с.* **1.** Сихыр (1 мәғ.) көсөнә эйә булған; сихри. *Был таяк сихырлы икән, шуның менән үлек кешегә һуккаң, терелә лә китә икән* (Әкиәттән).

**2.** Сихыр (1 мәғ.) тәьҫиренә дусар булған. *Сихырлы аш. Сихырлы кеше.* ■ *Мин дә киттем күҙ нурына тартылып, сәрхуш булып, шул сихырлы дуңғәләктә коршалып, мәхбүс булып.* Ш. Бабич.

**3.** *күсм.* Күңелде арбап иретерлек; һокланғыс, сихри. *Сихырлы күҙ. Сихырлы моң.*

**СИХЫРСЫ** *и.* Сихыр (1 мәғ.) менән шөғөлләнгән кеше. // *Сихырсы кеше.* ■ *[Вәзир — ханға:] Гөлкәй һеҙгә кәләш булып барырға риза булһа, ул картты сихырсы кире кеше сифатына кайтарыр.* И. Ниғмәтуллин. *Үгәй әсә .. бер көндө сихырсы карсыкка барған да: — Сөйәлбайҙы үлтерер өсөн миңә берәй әмәл өйрәт,— тигән* (Әкиәттән).

**СИХЫРСЫЛЫК** *к.* Сихырсы шөғөлө. *Сихырсылыкта гәйепләү.*

**СИХӘТ** [*гәр.*] *и.* Һаулык өсөн файҙалы тәьҫир; шифа. *Сихәт булыу. Сихәт алыу. Сихәт биреү. Сихәт табыу.* ■ *[Шаһим мулла:] Ярай, улай булгас, өшкөрәйем, иншалла, сихәте булыр.* К. Даян. *Һөйөү зәмзәмдәрен эсһәң, йәнгә сихәт була икән.* А. Игебаев.

**СИХӘТЛЕ** *с.* Һаулык өсөн файҙалы; шифалы. *Сихәтле һыу.* ■ *Һакмар буйҙарының шифалы һауаһын еҫкәп, сихәтле кымыҙын эсеп, һаулығыңды нығыт.* Й. Солтанов.

**СИХӘТЛЕК** *и.* Иҫән-һау булған хәл. *[Карт:] Бер ҙә сихәтлегем юк. .. Бөгөн әллә ниңә тәндәрем һыҙлап тора әле.* В. Исхаков.

**СИХӘТЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Ауырыуҙан котолдороу; һауыктырыу, шәбәйтеү. *[Мулла:] Беҙҙең вазифа шул бит, еңгә,— бәндәләргә кулдан килгәнсә ярҙам итеү, сихәтләндереү.* З. Биишева. *[Фәгилә — Шәмсиәгә:] Шайтан. .. Һин белгәнде бына был әбекәң күптән белгән, күптән күргән, күптәрҙе сихәтләндергән.* Ғ. Хәйри.

**СИХӘТЛӘНЕҮ** *к.* Ауырыуҙан котолоу; һауығыу, шәбәйеү. *Фәгилә әбей, .. ошо тоҙҙо эсһәң, иртәгә сихәтләнерһең, тигәйне.* Ғ. Хәйри.

**СИХӘТЛӘҮ** *к. диал.* Им-том итеү, дауалау.

**СКАЛЬПЕЛЬ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Бәләкәй хирург бәкеһе.

**СКАРЛАТИНА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Температура күтәрелеү, сабыртма сығыу, ангина менән билдәләнеп, күберәк балалар ауырый торған бик йоғошло ауырыу. *Скарлатина менән ауырыу.*

**СКАТКА** [*рус.*] *и. хәрби* Яурын аша кейер өсөн йомарлап төрөп, ике осон кушып бәйләгән шинель. *Скатка яһау. Скатканы һүтеү.* ■ — *«Батальон, сафка!» Кыҙылармеецтәр, командирҙар скаткалағы шинелдәренә, токтарына, өсаякка куйылған винтовкаларына табан ашыкты.* Б. Дим.

**СКАФАНДР** [*рус.* ⟨ *фр.* ⟨ *гр.*] *и.* Төрлө шарттарҙа тереклек һаклау һәм эшләү мөмкинлеге биргән индивидуаль герметик кейем. *Водолаз скафандры. Космонавт скафандры.*

**СКВАЖИНА** [*рус.*] *и.* Ерҙе быраулап яһаған тәрән, тар тишек. *Быраулау скважинаһы. Газ скважинаһы. Нефть скважинаһы.* ■ *Скважиналарҙың кайһы берҙәре фонтан ысулы менән эшләй, качалка менән эшләгәндәре лә бар.* Ғ. Ибраһимов. *Ишембай ауылы эргәһендә 1932 йыл быраулаған скважина көслө фонтан атып, башкорт илендә заманалар буйы йәшеренеп яткан нефть диңгеҙен асты.* «Ағиҙел», 1969, № 3.

**СКВЕР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Кала эсендәге бәләкәй дөйөм бакса.

**СКЕПТИК** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Скептицизм (1 мәғ.) яклы кеше.

**2.** Һәр нәмәгә шикләнеп, икеләнеп караусан кеше; шиксел кеше. *Яппар пассив скептик кенә лә түгел. Үҙенең һөрһөп бөткән фекерҙәре менән ул кулы еткән һәр берәүҙе ағыуларға тырыша.* К. Әхмәтйәнов.

**СКЕПТИК** *с.* **1.** Скептицизмға (1 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Скептик идеализм.*

**2.** Скептицизм (2 мәғ.) менән һуғарылған. *Скептик мөнәсәбәт. Скептик караш.* / Скептицизмды (2 мәғ.) сағылдырған. *Скептик тон.*

**СКЕПТИЦИЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Объек-

тив булмышты үҙ дөрөҫлөгөндә белеү мөмкинлеген кире ҡаҡҡан философик ҡараш.

**2.** Нимәнеңдер дөрөҫлөгөн, мөмкинлеген ҡаты шиккә алған мөнәсәбәт. *Ысынбарлыҡҡа скептицизм менән ҡарау.*

**СКЕ́РЦО** [*рус.* 〈 *ит.*] *и. муз.* Йәнле итеп башҡарыла торған, ҡыҙыу темптағы бәләкәй музыкаль әҫәр. / Ҙур музыкаль әҫәрҙең (симфония, сонатаның) ошондай темптағы өлөшө.

**СКЕТЧ** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* Ике-өс башҡарыусыға иҫәп тотоп яҙылған шаян йөкмәткеле ҡыҫҡа эстрада пьесаһы. *[Зәкиә Арсланова] филармонияла йырланы, бейене, скетчтарҙа уйнаны.* И. Абдуллин.

**СКИ́ПЕТР** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Монархтың хакимлыҡ билдәһе һаналған, аҫыл таштар, семәрҙәр менән биҙәлгән таяҡ.

**СКИПИДА́Р** [*рус.*] *и.* Ылыҫлы ағастарҙың сайырынан ҡыуып алына торған ҡырҡыу еҫле, төҫһөҙ йәки һарғылт шыйыҡлыҡ (медицинала, лак, буяу етештереүҙә һ. б. ҡулланыла).

**СКИ́Ф** [*рус.*] *и.* Беҙҙең эраға тиклемге 7 быуаттан алып беҙҙең эраның 3 быуаттарына тиклем Ҡара диңгеҙҙең төньяғында йәшәгән үҙ-ара туғандаш төрлө күсмә ҡәбиләләрҙең дөйөм исеме. *Скиф ҡурғандары. Скифтар сәнғәте.*

**СКЛАД** [*рус.*] *и.* Тауар, материал, серье, төрлө ҡорамал һаҡлай торған махсус бина. *Хәрби склад. Аҙыҡ склады. Магазин склады. Склад мөдире.* ■ *Байғужа менән Буранбай .. кухня складына барып, ярты һарыҡ ите, бер тауыҡ, ярма, консервалар, суска майы урлап алып ҡайтҡандар.* Д. Юлтый.

**СКЛЕРО́З** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Туҡымала йәки берәй ағзала ниндәйҙер махсус элемент әҙәйгәндә йәки уны тоташтырыу туҡымаһы менән алмаштырғанда уларҙың тығыҙланып ҡатыуынан булған ауыртыулы процесс. *Тамырҙарҙың склерозы. Йөрәк склерозы.*

**СКЛЕРО́МЕТР** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Металл, минералдарҙың һ. б. ҡатылығын үлсәй торған прибор.

**СКЛЕРО́ТИК** [*рус.*] *и. һөйл.* Склероз менән ауырыған кеше.

**СКЛЕРОТИ́К** *с.* **1.** Склерозға мөнәсәбәтле. *Склеротик процесс.*

**2.** Склероз менән сирле. *Склеротик вена.*

**СКРЕ́ПЕР** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* Тупраҡты, ерҙе сүмесе менән ҡатлам-ҡатлам итеп киҫеп алып, икенсе ергә ташый һәм бушата торған ер ҡаҙғыс машина. *Прицеплы скрепер. Үҙйөрөшлө скрепер.*

**СКРИ́ПКА** [*рус.*] *и.* Һыҙғыс менән уйнай торған дүрт ҡыллы, иң юғары диапазонлы музыка ҡоралы. *Скрипка уйнау.* ■ *Хәжиәхмәт .. скрипкаһын эйәк аҫтына ҡыҫтырып, башын уң яҡҡа ҡыйшайтып, башта ҡыҫҡа көй, шунан оҙон көйҙәр уйнай.* А. Таһиров. *Ағаһы ҡыл эшләп, скрипкаһын уйнатып ебәрһә, яңы ҡыл үҙәккә үтерлек итеп моңло йырлай, ти* (Әкиәттән).

**СКРИПКАСЫ** *и.* Скрипкала уйнаған музыкант. *Нәҙек оҙон бармаҡлы йоҡа ҡулдары менән Ғиззәт ағай печатник булыуға ҡарағанда скрипкасыға .. оҡшаңҡырай.* З. Биишева.

**СКУ́ЛЬПТОР** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Скульптура әҫәрҙәре ижад иткән рәссам. *Скульптор таланты. // Скульптор ҡатын.* ■ *Рәсих скульптор икән. Беҙ ингәндә, мастерскойында ҡорос өтөргө менән саҡҡылар сәсрәтеп, таш юнып тора ине.* Р. Ғабдрахманов.

**СКУЛЬПТУ́РА** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Йәбештереп, сүкеп, киҫеп йәки ҡойоп, күләмле һүрәттәр (статуя, бюст, барельеф һ. б.) тыуҙыра торған сәнғәт төрө.

**2.** Шул сәнғәттең әҫәре. *Декоратив скульптура. Скульптура оҫтаһы. Скульптура һүрәте. Скульптура балауыҙы. Скульптура балсығы.*

**СКУ́МБРИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** Орсоҡҡа оҡшағанырaҡ йомро кәүҙәле, ашау өсөн аулана торған ҙур булмаған диңгеҙ балығы. *Скумбрия ыуылдырығы.*

**2. скумбрия һымаҡтар** *зоол.* Скумбрия, тунец һ. б. балыҡтар ҡараған диңгеҙ ау балығы отряды исеме.

**СЛАВИ́СТ** [*рус.*] *и.* Славистика буйынса белгес.

**СЛАВИ́СТИКА** [*рус.*] *и.* Славян халыҡтарының тарихын, әҙәбиәтен, телен һ. б., шулай уҡ материаль һәм рухи культура ҡомартҡыларын өйрәнгән фәндәр йыйымы.

**СЛАВЯН** *и.* Европала теле һәм сығышы менән туғандаш булып, өс тармаҡҡа бүленгән халыҡтар төркөмө: көнсығыш славяндар (рустар, украиндар, белорустар), көнбайыш славяндар (поляктар, чехтар, словактар, лужичандар), көньяҡ славяндар (болғарҙар, сербтар, хорваттар, словендар, македондар, боснийҙар). *Боронғо славяндар.*

**СЛАВЯНИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* **1.** Славян теленән славян булмаған телдәр үҙләштергән һүҙ, һүҙбәйләнеш йәки әйтемдәр.

**2.** Иҫке славян йәки сиркәү славян теленән рус теленә ингән һүҙ, әйтем һәм морфемалар.

**СЛАВЯНЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Телен һәм ғөрөф-ғәҙәтен славянса итеү.

**СЛАВЯНЛАШЫУ** *ҡ.* Тел һәм ғөрөф-ғәҙәт буйынса славянға әйләнеү, славян булыу.

**СЛАВЯНОФИ́Л** [*рус.*] *и.* Славянофиллыҡ яҡлы кеше.

**СЛАВЯНОФИЛЛЫҠ** *и.* 19 быуат уртаһында Рәсәйлә барлыҡҡа килеп, Рәсәй үҙенә бер төрлө, Көнбайыш Европа илдәренекенә оҡшамаған тарихи үҫеш юлынан бара, тип раҫлаған ижтимағи һәм философик фекер йүнәлеше.

**СЛА́ЛОМ** [*рус.* 〈 *норв.*] *и.* Контроль флагтар ҡаҙап билдәләнгән бормалы юлдан саңғы менән тауҙан тиҙлеккә төшөү ысулы (тауҙан саңғы шыуыу спортының бер төрө). *Слалом саңғыһы. Слалом трассаһы.*

**СЛАЛОМСЫ** *и.* Слалом менән шөғөлләнгән спортсмен. *Слаломсылар ярышы. // Слаломсы ҡатын.*

**СЛА́НЕЦ** [*рус.*] *и.* Ҡатлаулы төҙөлөшлө һәм ҡатлау-ҡатлау булып ҡубып торған тау тоҡомо. *Балсыҡлы сланец. Янар сланец. Слюдалы сланец.*

**СЛЕ́ДОВАТЕЛЬ** [*рус.*] *и.* Енәйәт эшен судҡа тиклем тикшереп асыҡлай торған вазифалы кеше. *Иртәгеһенә Рәмзиә ханымды милицияға следователь Ғәлләмов саҡыртты. Енәйәтте ойош-*

*торған Волков менән Айратҡа күҙгә-күҙ осрашыу буласаҡ.* Х. Зарипов.

**СЛЕ́ДСТВИЕ** [*рус.*] *и.* Енәйәтте асыуға кәрәкле дәлилдәрҙе дөрөҫ тәртиптә йыйыу һәм тикшереү эше. *Следствие комиссияһы. Следствие эксперименты. Следствие үткәреү. Следствие яһау.* ■ *Биргән материалдар .. следствие барған ваҡытта Әмирхановтың Урманцевтар менән булған бәйләнешен асырға ярҙам итте.* С. Агиш.

**СЛЕСАРЛЫҠ** *и.* Слесарь эше. *Слесарлыҡ мастерскойы. Слесарлыҡ һөнәре.*

**СЛЕ́САРЬ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Металл нәмәләрҙе ҡулдан эшләү, йыйыу, йүнәтеү буйынса эшсе; белгес. *Йүнәтеүсе слесарь. Йыйыусы слесарь. Слесарь булып эшләү.*

**СЛЁТ** [*рус.*] *и.* Берәй күмәк ойошма ағзаларының, бер һөнәр вәкилдәренең һ. б. йыйылышы. *Йәш натуралистар слёты. Пионерҙар слёты.* ■ *Тауҙарҙағы йәйләүҙәрҙә эшләүселәрҙең слеты булды. Малсылар унда эш тәжрибәләре менән уртаҡлашты, күңелле ял итте.* Н. Мусин.

**СЛИ́ВА** [*рус.*] *и.* **1.** Роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған емеш ағасы йәки ҡыуағы. *Слива ултыртыу. Сливаға ашлама биреү. Слива япрағы.*

**2.** Шул ағастың, ҡыуаҡтың алһыу күк, һары һ. б. төҫтәге ҡаты эре төшлө емеше. *Слива компоты. Слива ҡағы.*

**СЛИП** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и. махс.* Караптарҙы һыуға төшөрә һәм күтәрә торған ҡоролма. *Затонда .. караптарҙы күтәреү өсөн беренсе класлы слип эшләнде.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 21 февраль.

**СЛИТКА** [*рус.* слиток] *и.* Артабан эшкәртеү өсөн иретеп, ҡалыпҡа ҡойған металл. *Ҡойоулы слитка. Алтын слиткаһы. Ҡорос слиткаһы. Суйын слиткаһы.* ■ *Прокат цехында .. хәҙер иһә слиткаларҙы валдарға махсус рольгангтар этеп индерә.* М. Хәйҙәров.

**СЛОБОДА́** [*рус.*] *и. иҫк. ҡар.* **биҫтә.** *Монастырь слободаһы. Стрелецтар слободаһы.*

**СЛОВА́К** *и.* Чехтар менән бергә Чехословакияның төп халҡын тәшкил иткән милләттәрҙең береһе һәм шул милләттең бер кешеһе (славян телдәренең береһендә һөйләшә). *Словак халҡы. Словак ҡатыны. Словак теле.*

**СЛОВЕН** *и.* Югославия составына ингән Словенияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (славян телдәренең береһендә һөйләшә). *Словен халҡы. Словен ҡатыны. Словен теле.*

**СЛУ́ЖБА** [*рус.*] *и. ҡар.* **хеҙмәт.**

**СЛЮДА́** [*рус.*] *и. ҡар.* **йылтырған** 1.

**СМЕ́НА** [*рус.*] *и.* **1.** Бер төркөмдө икенсе төркөм алмаштырғанға тиклемге ваҡыт араһы. *Беренсе смена. Иртәнге смена. Төнгө смена. Ике смена эшләү.* ■ *Беҙ пекарняла үҙ сменабыҙҙы тултырып, ял итергә туҡтаныҡ.* Т. Йәнәби. *Беренсе сменанан бушаған һәм икенсе сменаға килгән эшселәр бергә завод дворында йыйылды.* Ә. Вәли.

**2.** Үҙ-ара алмашынып торған айырым-айырым кешеләр төркөмө. *Смена бригадиры.* ■ *Ырҙында төнгө смена эшләй, ашлыҡ елгәрә.* З. Биишева.

**СМЕНАЛАП** *р.* Смена менән, смена булып. *Сменалап эшләү.*

**СМЕНАЛЫ** *с.* Смена менән эшләүгә ҡоролған. *Сменалы эш.*

**СМЕ́НЩИК** [*рус.*] *и. ҡар.* **алмашсы.**

**СМЕ́ТА** [*рус.*] *и.* Буласаҡ керем-сығымды билдәләгән иҫәп, нимәнеңдер яҡынса иҫәбе. *Смета төҙөү. Сметала ҡарау. Сығымдар сметаһы.*

**СМИ́РНО** [*рус.*] *р.* Төп-төҙ баҫып, һөйләшмәй, ҡуҙғалмай торорға ҡушҡан хәрби команда. *Старший унтер .. «Смирно!» — тип команда бирҙе.* Д. Юлтый. / Шул рәүештә баҫҡан хәл. *Смирно баҫып тороу.*

**СМО́КИНГ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Ебәк баҫҡан оҙон ҡайтарма яғалы, асыҡ түшле ҡара пинжәк.

**СМОТР** [*рус.*] *и.* **1.** Нимәнеңдер (ғәҙәттә ғәскәри частың) тантаналы рәүештә ҡаралыуы, рәсми тикшерелеүе. *Смотр яһау. Смотр үткәреү. Смотрға әҙерләнеү.* ■ *Республика етәкселеге байрам көнөндә дивизияға смотр яһарға булды.* Ә. Ихсан. *Смотрҙан һуң беҙ ҡайтып, аш ашап ултырғанда рота писаре Барсук килде.* Д. Юлтый.

**2.** Нимәнеңдер эш һөҙөмтәһенең халыҡ алдында күрһәтелеүе, йәмәғәт алдында тикшерелеүе. *Район смотры. Үҙешмәкәр түңәрәктәрҙең республика смотры. Смотрҙа ҡатнашыу. Смотр үткәреү.* ■ *Ҡурай тартып, гармун уйнаттырып, смотрҙар уҙып киттеләр.* Ғ. Дәүләтов.

**СНА́ЙПЕР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Махсус хәрби мылтыҡтан төҙ атыуға, маскировкаға һәм күҙәтеүгә оҫта булған мәргән. *Снайперҙар мәктәбе.* ■ *Кировоград ҡалаһына .. беренселәрҙән булып Лоҡманов снайперҙары бәреп инә. Был иҫ киткес мәргәндәр группаһы .. ҡалаға инеү өсөн юл аса.* И. Ғиззәтуллин. *Янсаповты ротаның ғына түгел, бәлки тотош полктың мәргән снайперы итеп танытҡан үткер күҙҙәре күрмәҫ була.* М. Хәйҙәров.

**СНА́ЙПЕРЛЫҠ** *и.* Снайпер мылтығынан атыу оҫталығы, мәргәнлек. *Снайперлыҡҡа өйрәнеү.* ■ *[Хәлил — Нестеровка:] Оҙаҡламай атыу буйынса көҙгө һынауҙар башлана. Мин һеҙҙең снайперлыҡ һәләтегеҙҙе беләм, .. алдынғылыҡты бирмәҫһегеҙ тип ышанам.* Б. Дим.

**СНАРЯ́Д** [*рус.*] *и.* **1.** Туптан, миноместтан, реактив артиллериянан атыу өсөн тәғәйенләнгән һуғыш кәрәк-ярағының бер төрө. *Фугаслы снаряд. Яҡтырткыс снаряд.* Яндырғыс снаряд. *Ярсыҡлы снаряд. Реактив снаряд. Артиллерия снаряды.* ■ *Бер урында һалдаттар снаряд ярсығы менән яраланған бер крәҫтиәндең яраһын бәйләй.* Д. Юлтый. *Беҙҙең снарядтар Бәҙриҙең баш осонда ғына ярылды — әллә үлем үҙебеҙҙең снарядтан буламы инде тип уйлап ҡуйҙы офицер.* И. Кинйәбулатов. *Снаряд ярсыҡтары Байгилдиненң бот һөйәген йәнсекләп бөткән.* З. Биишева.

**2.** Ниндәйҙер эш башҡарған техник ҡоролма, аппарат, механизм. *Агас төпләү снаряды. Быраулау снаряды. Ер һурыу снаряды. Тоҙ сығарыу снаряды.*

**3.** Спорт күнекмәләре алып бара торған нәмә, ҡоролма. *Гимнастика снаряды. Һикереү снаряды.*

**СНАРЯЖЕ́НИЕ** [*рус.*] *и. кар.* **кәрәк-ярак.**

**СОБОР**[1] *окш.* Һыу йәки бүтән шыйыклык нәҙек кенә булып нимәлер өҫтөнә ағып торғанда сыккан тауышты белдергән һүҙ. *Собор итеп ағып тороу.*

**СОБОР**[2] [*рус.*] *и.* **1.** Революцияға тиклемге Россияла: вазифалы һәм һайланып куйылған кешеләрҙең ойоштороу һәм идара итеү мәсьәләләрен карай торған йыйылышы. *Земство соборы.*

**2.** Юғары катлам христиан руханиҙарының йыйылышы. *Сиркәү соборы.*

**3.** Кала йәки монастырҙың юғары дәрәжәле рухани кешеләре (патриарх, епископ, архимандрит) ғибәҙәт кыла торған оло сиркәүе. *Кафедраль собор.*

**СОБОРЛАТЫУ** *к.* Собор-собор иттереү, собор-собор килтереү. *Соборлатып һыу ағыҙыу.*

**СОБОРЛАУ** *к.* Собор-собор итеү, собор-собор килеү. *Соборлап ағыу.* ■ *Фәхри .. танауынан соборлап аккан канын бер кулы менән һөртә.* Б. Бикбай.

**СОБОР-СОБОР** *окш.* Кабат-кабат собор иткән тауышты белдергән һүҙ. *Собор-собор йәш аға. Собор-собор һыу аға.*

**СОБХАН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Дан. *Кешенән тапманым ярҙам, гәнимәт эйләһен собхан* (Мөнәжәттән).

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

♦ **Собхан алла** *кар.* **алла.**

**СОБЫХ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Таң. *Танымаҫһың күҙең асып собых илә шамды* (Бәйеттән).

**СОВЕТ**[1] [*рус.*] *и.* **1.** Берәй учреждение, ойошма, йәмғиәт янындағы етәксе йәки кәңәшсе орган. *Берләшкән милләттәр ойошмаһының Именлек советы. Бөтә донъя тыныслык советы. Дружина советы. Заводтың техник советы. Институттың ғилми советы. Катын-кыҙ советы.* ■ *Дөйөм ятакта тәрбиә сараларын үткәреүҙә ятак советы төп ячейка булып тора.* Ф. Мөхәмәтйәнов.

**2.** Һайлап куйылған йәки тәғәйенләнгән кешеләрҙән тороп, деүләт тормошонда йәки уның ниндәйҙер тармағында етәксе урын тоткан кайһы бер дәүләт идара органдарының исеме. *СССР Министрҙар Советы. Старейшиналар советы.*

**СОВЕТ**[2] [*рус.*] (*ҙур хәреф менән*) *и.* **1.** СССР-ҙа дәүләт власының вәкәләтле органы, социалистик йәмғиәттә политик королоштоң бер формаһы. *Совет власы. Совет дәүләте. Советтар иле. СССР Верховный Советы. Халык депутаттарының Советтары.* / *һөйл.* Совет власына карата. *Хәҙергә ауыл ярлылары советка күп кенә киләләр, ләкин улар өсөн беҙ берәй файҙалы эш эшләмәһәк, беҙҙән биҙә лә башларҙар бит.* Ғ. Дәүләтшин. *Фетнә һалып йөрөгән шайтандарҙы советтарға тотоп килтерең.* Ш. Бабич. *Яңғырат киң яланды [батрак] шатлык менән илдә совет булған заманда.* Б. Ишемғол.

**2.** Советтар иленә, СССР-ға мөнәсәбәтле булғанды белдерә. *Совет Армияһы. Совет конституцияһы. Совет халкы. Совет хөкүмәте.*

**СОВЕТЛАШТЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **советлаштырыу.**

**СОВЕТЛАШТЫРЫУ** *к.* Совет власын урынлаштырыу, совет яғына күсереү. *Илде советлаштырыу.*

**СОВЕТЛАШЫУ** *к.* Совет власы урынлашыу, Совет власын кабул итеү, совет яғына күсеү.

**СОВЕ́ТНИК** [*рус.*] *и.* **1.** Кайһы бер вазифалар һәм шул вазифалағы кешеләр атамаһы. *Хәрби советник. Дәүләт юстиция советнигы. Илселек советнигы.* ■ *1938 йылдың яҙында В. Т. Маслов Испанияға китә, унда 38-се коммунистик корпустың, һуңынан армияның советнигы булып эшләй.* Т. Сәғитов.

**2.** Революцияға тиклемге Россияла граждандык дәрәжәһе (рангылар табеле буйынса) һәм шул дәрәжәләге кешеләр атамаһы. *Надворный советник. Статский советник. Титуляр советник.*

**СОВЕТСЫ** *и. һөйл.* Совет власы яклы кеше.

**СОВНАРКО́М** [*рус.*] *и. тар.* Халык комиссарҙары Советы. *Совнарком председателе.*

**СОВНАРХО́З** [*рус.*] *и. тар.* Халык хужалығы Советы.

**СОВХО́З** [*рус.*] *и.* Советтар Союзында эре дәүләт ауыл хужалығы предприятиеһы. *Игенселек совхозы. Мамыксылык совхозы. Һарыксылык совхозы.*

**СОВХОЗЛАШТЫРЫУ** *к.* Совхозға әйләндереү, совхоз итеү.

**СОВХОЗЛАШЫУ** *к.* Совхозға әйләнеү, совхоз булыу.

**СОҒА** *и.* Юғары сифатлы йока буҫтау (кыҙыл төҫтәгеһе менән ғәҙәттә яға, ең, итәктәрҙе һ. б. әҙепләй торған булғандар). *Күк соға. // Кыҙыл соға камзул.* ■ *Ул [Ныяҙғол] йәшел соға елән кейгән, билен көмөш кәмәр менән быуған.* Һ. Дәүләтшина. *Йыйылышка килер кеше килеп бөттө. Булат карт, өҫтөнә кыҙыл соға ябылған өҫтәл янына баҫып, йыйылышты асты.* Ә. Чаныш.

**СОҒАЛЫ** *с.* Ең, яға, итәктәре һ. б. соға менән әҙепләүле. *Соғалы сәкмән. Соғалы елән.* ■ *Үҫәргән улы Шәғәле, ят-ябыуы соғалы.* „Башкорт шәжәрәләре", 1960.

**СОҒОЛ** *с.* Тәрән мәғәнәле, тәрән фекерле; төплө. *Соғол кеше. // Соғол уйлау.* ■ *Шиғырҙан [М. Кәримдең „Торналар кайтканда" шиғырынан] революцион традицияларға тоғро булыу һәм уны кәҙерләү, карт коммунистарҙың ауыр һәм шанлы юлын хөрмәтләй белеү, заман, выждан, намыҫ, бурыс хакында тәрән уйландыра торған пафослы соғол фекерҙәр бөркөлә.* Ғ. Хөсәйенов.

**СОҒОЛЛОК** *и.* Тәрән мәғәнәлелек, тәрән фекерлелек; төплөлөк. *Ул соғоллок [шағирҙың соғоллоғо] үҙҙәренә бәрәбәр поэтик формаларға һалыныуы менән пафослы.* Ғ. Хөсәйенов. *Быуаттарҙың соғоллоғо һеңгән ошо ике ябай коралға [урак менән сүкешкә].* Р. Ғарипов.

**СО́ДА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** (*йәки* **кер содаһы, кальцийлы сода**) Техникала һәм көнкүрештә кулланылған күмер кислотаһының кайһы бер натрий тоҙҙарының атамаһы.

**2.** (*йәки* **аш содаһы**) Ике өлөшлө күмер кислоталы натр ак онтак матдә (медицинала һәм кулинарияла кулланыла).

**СОДАЛЫ** *с.* Сода ҡушылған. *Содалы иретмәләр.* **Содалы һыу** яһалма минераль һыу, аш содаһы менән тоҙҙоң газлы һыуҙағы иретмәһе.

**СОДОКЛАД** [*рус.*] *и. шул ук* **өҫтәмә доклад** (*ҡар.* **доклад**).

**СОЕДИНЕНИЕ** [*рус.*] *и. хәрби* Бер йәки төрлө төр ғәскәрҙең бер нисә частарынан торған эре ғәскәри берәмек (бригада, дивизия, корпус һ. б.). *Авиация соединениеһы. Танк соединениеһы.* ■ *Башҡорт дивизияһы .. күрше соединениелар менән берлектә дошманды актив хәрәкәт итәйелдереп ебәреү мөмкинлегенән мәхрүм итте.* Ә. Ихсан. *Команда пунктына соединение командирҙары йыйылды.* З. Рафиҡов.

**СОЖ** *окш. ҡар.* **саж.**

**СОЙОРҒОУ** *к. диал.* Сорғоу.

**СОКОЛ** [*рус.*] *и. ҡар.* **ҡалаҡ** 2.

**СОҠАЛАҠ** *и. диал.* Соҡалта. *Мейес соҡалағы.*

**СОҠАЛАУ** *к. диал.* Соҡсоноу.

**СОҠАЛТА** *и.* Мейес ҡабырғаһына ҡомған, самауыр ултыртыу, бейәләй һ. б. һалып киптереү өсөн яһалған уйым. *[Әбей] соҡалтала эҫеп ултырған ҡомғанды алып, яҡшылап ҡул йыуҙы.* З. Биишева.

**СОҠАЛТАЛАУ** *к.* Соҡалталы итеү. *Мейестe соҡалталап сығарыу.*

**СОҠАНАҠ** *и.* Күләүекләнеп, һыу йыйылып ятҡан уйпат ер.

**СОҠОЛ** *и. диал. ҡар.* **соҡор** [1].

**СОҠОЛОҠ** *и.* Малдың күкрәк һөйәгенең алғы өлөшө.

**СОҠОЛОУ** *к. төш. ҡар.* **соҡоу** (1, 2 мәғ.). *Соҡолған ағас. Соҡолған ер.*

**СОҠОНМА** *с. диал. ҡар.* **бөтмөр** 1.

**СОҠОНОУ** *к.* **1.** Үҙ алдыңа нимәнелер соҡоу (1—3 мәғ.), ҡаҙыныу. *Ерҙә соҡоноу.* ■ *Хәтмулла бер килеүендә баҡсала соҡонһа, икенсеһендә йорт ихатаһының ҡупҡан таҡтаһын рәтләне.* Д. Исламов.

**2.** Эсенә ҡул тығып, аҡтарып, нимәләр эҙләү, табырға тырышыу. *Ғибаҙулла бәләкәй киндер тоҡсайы эсендә соҡона торғас, бер тәлем әсикмәк сығарҙы.* Н. Мусин. *Двигатель тоҡанманы. Тормоздар туңды. Шофёр соҡондо-соҡондо ла, эш сығырҙай булмағас, радиаторҙың һыуын ағыҙып, эскә инеп ултырҙы.* Р. Солтангәрәев.

**3.** *күсм.* Нимәләр табыу маҡсатында артыҡ эҙләнеү, төпсөнөп тикшереү. *Ғәҙел аҙбар тирәһенә йыш килә башланы. .. Эҙләнә инде! Фактттар эҙләй. Тегене ҡарай, быға күҙ һала. Соҡона хәҙер. Кермәгән аҙбары, тикшермәгән нәмәһе юҡ.* Ғ. Лоҡманов. *Соҡонһаң, бик яҡшы кешенең дә була бер ғүлләһен табырға.* Б. Вәлит.

**СОҠОР** [1] *и.* **1.** Ер өҫтөндәге ямғыр, ҡар һыуҙары тупраҡты оҙаҡ ваҡыт йыуып ашағандан барлыҡҡа килгән тәрән текә ярлы оҙон урын; йырын. *Соҡор аҫты. Соҡор буйы. Соҡорҙо сығыу. // Соҡор ер. // Соҡор буйлап барыу.* ■ *Урал тауының араһындағы текә соҡорҙар, тәрән үҙәктәрҙән .. томан өҙөктәре тау башына үрелә.* Ғ. Дәүләтшин. *Әүәл-әүәлдән был тау башында төпкә инеп киткән әллә ниндәй тау тишектәре, төпһөҙ соҡорҙар, мәғәрәләр булыуы унда ҡасҡандар йәшәгәне тураһында һөйләй.* С. Ханов.

**2.** Ямғыр, ҡар һыуы иҙгән ерҙә барлыҡҡа килгән тәгәрмәс һ. б. эҙе. *Арба янтайып лып ултырҙы. Соҡорға тулған һыу күсәрҙән аша һуҡты.* М. Тажи.

**3.** Ҙур йәки бәләкәй итеп ҡаҙылған, соҡолған йәки убылып аҫҡа төшкән урын. *Бағана соҡоро. Нигеҙ соҡоро. Окоп соҡоро. Соҡорға төшөү. Соҡорҙан сығыу.* ■ *Карст соҡорҙары. Улар ваҡ күлдәр булып, йылға буйлап бер-бер артлы теҙелеп киткән.* Д. Бураҡаев. *Тағы бер-ике көрәк алғас, [Байназар] соҡорҙан снаряд гильзаһы тартып сығырҙы.* Б. Бикбай.

**4.** Бомаба, мина йәки снаряд шартлап, ерҙәге тупраҡ тирә-яҡҡа алып ташланғандан барлыҡҡа килгән өҫкә табан киңәйә барған уйынҡы урын. *Абдрахман .. биленән һуңғы бомбаны алып, йән асыуы менән үҙен уратып алған аҡтарға ташлаған. Бомба төшкән ерҙә ҙур соҡор яһалған.* Ә. Вахитов. *Польша ере. Уралдағы кеүек, ҡатлы, ҡалын тиреле түгел —.. бер ауыр снаряд соҡор ҡаҙыһа, коҙоҡ сыға, бер метр окоп ҡаҙыһаң, һыу сыға.* Д. Юлтый.

**5.** Тәндең эскә батыңҡырап, тишекләнеп торған ере. *Бит соҡоро. Эйәк соҡоро. // Соҡор бит. Соҡор эйәк.* ■ *Мин яҡшы беләм: беҙҙең әсәй, ике тапҡыр әйтеп тә тыңламаныңмы, өсөнсөгә ҡабатлап та тормай, елкә соҡорона килтерә лә тондора.* З. Ғәлимов. **Күҙ соҡоро** баш һөйәгендә күҙ алмалары урынлашҡан соҡор урын. / Теш боҙолғандан барлыҡҡа килгән тишек. *Теш соҡорон яматы.*

◆ **Елкәһе соҡор** *йәки* **соҡор елкә** *ҡар.* **елкә.** *Һөргәндә инде уның [Шәүәлиҙең] ағас адвокатлығы башлана — телгә шәп, ә эшкә елкә соҡор.* Б. Бикбай. **Соҡор ҡаҙыу** аҫтыртын яуызлыҡ менән кемгәлер һәләкәт әҙерләү. **Соҡор туп** *ҡар.* **туп** [1].

● *Кешегә соҡор ҡаҙһаң, үҙең төшөрһөң.* Мәҡәл. *Соҡор булһа ла юл яҡшы, һуҡыр булһа ла ҡыҙ яҡшы.* Мәҡәл.

**СОҠОР** [2] *и. диал.* Сынаяҡ өҫтө (*ҡар.* **сынаяҡ**). *Ҡарт проводник тиҙ генә бер соҡор һыу алып, аттың танауына бөрктө.* А. Таһиров.

**СОҠОРАЙТЫУ** *к.* Соҡор [1] барлыҡҡа килтереү, соҡорло итеү. *Бит соҡорайтыу.* ■ *Баҡсаның сәскә үҫер урындарын туптар төшөп соҡорайтҡан.* Ғ. Зөлкәрнәйев.

**СОҠОРАЙЫУ** *к.* Эскә батып, соҡорға әйләнеү (биткә ҡарата). *Көлгәндә әсәйемдең бит остары соҡорайып китә.* Ғ. Ғүмәр.

**СОҠОРЛАНЫУ** *к.* Соҡор (1—3 мәғ.) барлыҡҡа килеү, соҡорло булыу. *Соҡорланған юл.* ■ *Таштау .. карст мәмерйәләре менән соҡорланып бөткән.* Д. Бураҡаев. *Зифа һөйләй тормош юлдарын, ваҡыт-ваҡыт соҡорланып куя иң уртаһы уң яҡ битенең.* Ғ. Мәсғүт.

**СОҠОРЛО** *с.* Соҡорҙар булған, тигеҙ булмаған. *Соҡорло ер. Соҡорло юл.*

**СОҠОРЛОК** *и.* Соҡор-саҡырлы урын, тигеҙһеҙ ер.

**СОҠОРЛО-САҠЫРЛЫ** *с. ҡар.* **соҡор-саҡырлы.** *Юлы таулы, соҡорло-саҡырлы ине.*

М. Тажи. *Ушельеның урамы соҡорло ла сарылы.* С. Агиш.

**СОҠОР-САҠЫР** *и. йыйн.* Эреле-ваҡлы төрлө соҡор. *Соҡор-саҡыр ерҙән үтеү.* ■ *Өмөтбайҙың бисәһе [ер] иҙәндең соҡор-саҡырын тигеҙләп һылап торғанға, ул тип-тигеҙ булып ҡатып киткән.* Ғ. Дәүләтшин. *Тора-бара ямғыр ҙа шәбәйҙе. Юлдағы соҡор-саҡырҙар күләүеккә әйләнде.* М. Тажи.

**СОҠОР-САҠЫРЛЫ** *с.* Күп соҡорло, тигеҙһеҙ. *Соҡор-саҡырлы ер. Соҡор-саҡырлы урам.* ■ *Ҡала үҙе лә окшап етмәй уға: урамдары соҡор-саҡырлы, бысраҡ.* Б. Бикбай. *Таулы-ташлы ерҙәрҙе, соҡор-саҡырлы урындарҙы үттеләр, ти былар.* «Урал батыр».

**СОҠОТОУ** *к. йөкм. ҡар.* **соҡоу** 1—3. *Ер соҡотоу.*

**СОҠОУ** *к.* **1.** Нәҙек, осло йәки үткер нәмәне батырып аҡтарыу, нимәнелер ҡаҙып сығарыу. *Яраны соҡонолар. Ауырта, йөрәктәргә үтә.* Д. Юлтый. *Мөбәрәкшин кеҫәләрен һәрмәп, шырпы эҙләп тапты ла, уның береһен һындырып алып, телен соҡой башланы.* В. Исхаҡов. *Мәскәй әбей Аҡҡолаҡ менән Һаҡҡолаҡтың ҡолағына ҡурғаш ҡойоп киткән. Турғай ҡурғашты соҡоп алған* (Әкиәттән).

**2.** Ниндәйҙер үткер ҡорал менән уйып, эсен соҡорлап, нимәлер яһау, эшләү. *Ялғаш соҡоу.* ■ *Юламан ҡарт .. ҡарағастан соҡоп, һыу кошона окшатып эшләгән, үҙе менән йәштәш кәмәһенә ултырып, диңгеҙ сенә, балыҡ һунарына сығып киткән.* З. Биишева. *[Һары ла сәс] ниндәй генә таш битенә күҙ һалмаһын, ташҡа соҡоп яҙылған яҙыуҙар осраткан.* М. Буранғолов. *Ташҡайҙарға соҡоп яҙҙым карғыш, ейәндәрем уҡыр бер сакта* (Халыҡ йырынан).

**3.** Көрәк йәки башҡа ҡорал менән ерҙе аҡтарып өңөү; ҡаҙыу. *Ер соҡоу.* ■ *[Эшселәр шахтала] соҡолған ерҙең эсенә ярты кәүҙәһе кимәлендә инеп, кәйлә менән соҡой бирә ине.* Т. Хәйбуллин. *Полктар .. урманды әйләндереп траншеялар, окоптар соҡоно.* Ә. Ихсан. *Көлтә аҫтына ер соҡоп, ултыртып ҡуйылған айранлы көршәктәр ҙә йылынған.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** *күсм.* Нимәнелер тикшереп, төпсөп табыу, билдәле итеү. *Шәхми бай .. мыжыҡ, юкбарҙы соҡоу тиһәң — яллап ҡуйған кеүек.* Т. Йәнәби. *[Хәйернисa:] Ярар, ҡарт башың менән әллә ҡасанғыны соҡоп сығарма.* Н. Нәжми.

**СОҠОШОУ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **соҡоу** 1—3. *Ер соҡошоу. Таш соҡошоу.*

**СОҠСОНОУ** *к.* **1.** Ниндәйҙер ваҡ эш менән үҙ алдыңа оҙаҡ булышыу. *Шофёрҙар машина тирәһендә соҡсона.* ■ *Урман бабай .. күбеһенсә үҙ баксаһында ғына соҡсона.* Ш. Янбаев.

**2.** *күсм.* Нимәлер табырға, асыҡларға тырышып эҙләнеү, төпсөнөү. *Беҙҙең халыкты беләһегеҙ бит инде. Уның эше тикшереп тә соҡсоноп йөрөү.* И. Ғиззәтуллин. *[Ғәйзулла] туҡталыптуҡталып, комло балсыҡтарҙы тикшерҙе, усында ыуҙы. Таш араһынан нимәлер эҙләнде, соҡсонды.* Я. Хамматов.

**СОЛ** *и. иҫк.* Бәләкәй йылға. *Ялтырап та ятҡан ай сол микән, ике яғы ҡалҡыу юл микән* (Халыҡ йырынан).

**СОЛАН** *и.* Ишек сыҡҡан яҡҡа эшләнгән мейесһеҙ алғы бүлмә. *Урта солан. Мунса соланы. Солан ишеге. Соланға инеү. Соланға сығыу.* ■ *Сания мине оҙатырға соланға сыҡты.* Н. Мусин. *Ҡыҙҙар .. соландан өйгә инеринмәҫ булып өймәкләшеп, оялышып торалар.* Һ. Дәүләтшина.

**СОЛАНСА** *и.* Кәрәк-яраҡ ҡуйыу өсөн солан эсенә яһалған бүлмә. *Теге кеше солансаға инеп юғалды һәм күп тә үтмәй ҙур кәрзингә тултырып вино, ҡыҙҙырылған суска бото, ҙур каравай килтереп, өҫтәлгә ҡуйҙы.* С. Кулибай.

**СОЛҒАНЫУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **солғау** 1. *Үлдем инде, солғанырмын кәфен атлы бүҙ менән* (Бәйеттән).

**2.** *диал.* Төрөнөү, ураныу. *Ғәзимә .. ебәккә солғаныб килгән атаҡлы старшина ҡыҙы булыуға ҡарамай, көндәшкә дусар булыуы өсөн әсе күҙ йәштәре түккән дә яҙмышына риза булған.* Һ. Дәүләтшина.

**СОЛҒАНЫШ** *и.* Кемде, нимәнелер уратып алған тирә-йүн.

**СОЛҒАУ** *к.* **1.** Тирә-яҡтан тотош уратыу, уратып ҡаплау. *Тирә-яҡты ҡараңғылыҡ солғаны. Ут өйҙө солғап алды.* ■ *Һалҡын ел .. иҙеү аша инеп, тәндәрҙе рәхәтләндереп солғай.* С. Агиш. *Тау биттәрен солғап яҡтыға, ҡояш сыға башлай.* Ғ. Сәләм. *Беҙҙе таңмы әллә солғағайны, әллә кистең күкһел шаршауы.* М. Кәрим. / *күсм.* Бөтә торошто, күңелде тотош биләү. *Күңелде дәрт солғаны. Ҡурҡыу солғап алды. Шатлыҡлы хис солғаны.* ■ *Рахманды ошо ялан кеүек сикһеҙ уйҙар диңгеҙе солғап алды.* Ә. Вәли. *Уның [Мазһарҙың] күңелен ауыр һағыш солғаны.* Ш. Насыров.

**2.** Тирә-яҡты тултырыу, тотош биләп алыу. *Мәтрүшкә, еләк, яңы сабылған һутлы үлән еҫе бөтә аҡланды солғап алған.* С. Кулибай.

**3.** Тирә-яҡтан ҡамау, кем йәки нимәлер тирәһенә йыйылыу; уратыу. *[Хәҙрәттең] тирә-яғын төрлө йәштәге, һәммәһе лә сәлләле мөриттәр солғап алған.* М. Ғафури. *Салауатты [һәм уның батырҙарын] халыҡ солғап алған.* М. Кәрим.

**СОЛҒОУ** *к. диал.* Салыҡлау. *Ат башын солғоп саба.*

**СОЛИДАР** [*рус.* солидарный] *с. ҡар.* **теләктәш.** *Солидар кеше. Солидар булыу.*

**СОЛИДАРЛЫҠ** *и. ҡар.* **теләктәшлек.** *Солидарлыҡ билдәһе. Солидарлыҡ күрһәтеү.*

**СОЛИДО́Л** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. махс.* Техникала машина, механизмдарҙы майлау өсөн ҡулланылған ҡуйы матдә.

**СОЛИ́СТ** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Соло партияһын башҡарған йырсы, музыкант йәки бейеүсе. // *Солист ҡатын.* ■ [*Тайфур:*] *Бөтә хикмәт шунда: Алмасов иптәш яңы ансамбль йыя. .. Солистар кәрәк, аңлайһығыҙмы?* Ш. Бикҡол.

**СОЛИТЁР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. зоол.* Кеше, мал эсәгендә була торған паразит булып йәшәгән таҫма

селәүсендәр отрядының атамаһы. *Суска солитёры. Һыйыр солитёры.*

**СО́ЛО** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Бер инструментта башҡарыу йәки яңғыҙ йырлау өсөн тәғәйенләнгән музыкаль әҫәр йәки айырым партия. *Скрипка өсөн соло.* / Бер кеше башҡарған бейеү, айырым партия йәки уның бер өлөшө.

**СОЛОҠ** *и.* **1.** Ҡырағай бал ҡортоноң ағас ҡыуышындағы ояһы. *Солоҡ балы. Солоҡ әҙләү.* ■ *Тауҙа ҡарағай үҫә, ә ҡарағай башында ҡырағай бал ҡортоноң ояһы — солоҡ.* Й. Солтанов. / Үҫеп ултырған ағасты соҡоп яһаған умарта. *Солоҡ ҡарағайы. Солоҡҡа менеү.* ■*Ботаҡһыҙ һырғый ҡарағайҙарға кирәм менән менеп, солоҡ юнғандар.* Ж. Кейекбаев. [*Ғәйзулла:*] *Атай, һин бында оҙаҡ булаһыңмы?* [*Атаһы:*] *Юҡ, солоҡто ҡарап ҡына киләм. Ҡорт ҡунмаған микән.* Я. Хамматов. **Солоҡ балтаһы** солоҡ юна торған оҙон һаплы бәләкәй балта. **Солоҡ ябыу** солоҡ умартаға ҡорт ябыу. — *Ғүмерем буйы нисә солоҡ ябып, .. ҡупме бал алғанмындыр — хисабына сығырлыҡ түгел.* Н. Мусин.

**2.** *диал.* Түмәр умарта.

**3.** *диал.* Бал ҡорто.

**СОЛОҠСО** *и.* Солоҡ (1 мәғ.) тотоу менән шөғөлләнгән кеше; умартасы. *Солоҡсоларҙы Башҡортостан дәүләт заповедниғынан башҡа ерҙә осратып булмайҙыр.* «Ағиҙел», 1967, № 3.

**СОЛОҠСОЛОҠ** *и.* Солоҡ (1 мәғ.) тотоу шөғөлө, умартасылыҡ. *Солоҡсолоҡ менән башҡорттар әүәл-әүәлдән шөғөлләнгән.* «Ағиҙел», 1967, № 3.

**СОЛОХ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Һуғышты туҡтатыу тураһындағы үҙ-ара килешеү. *Солох төҙөү. Солохҡа ризалашыу.* ■ *Европаның ундан тиғыҙ өлөш халҡы солох өсөн көрәшә.* Д. Юлтый. [*Бай:*] *Бик ҙур шөкөр, тышҡы дошман менән килешеп, тыныслыҡ солохо яһалды.* М. Ғафури. *Сулпан йондоҙ калҡҡас, солох булыр тип көтәбеҙ* (Бәйеттән).

**СОЛОХНАМӘ** [*гәр.*+*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Килешеү тураһындағы ҡағыҙ. *Солохнамәгә ҡул ҡуйыу.*

**СОЛТАН** *и.* **1.** Ҡайһы бер мосолман илдәрендәге нәҫелдән килгән батшалыҡ дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше. *Солтан һарайы.* ■ *Нур алды бары ла яҡты сулпандан, әмер алғандай ғәскәр солтандан.* И. Насыри.

**2.** *күсм.* Нимәнеңдер иң юғары сифат билдәһе. *Изгелек солтаны. Ир солтаны. Сәскә солтаны.* ■ *Һылыубикә — һылыу туташ, ҡыҙ солтаны.* Ш. Бабич.

● *Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул.* Әйтем.

**СОЛТАНАТ** [*гәр.*] *и. иҫк.* **1.** Башында солтан торған дәүләт; батшалыҡ. *Солтанат эшен башҡарыу.*

**2.** *күсм.* Мөһабәтлек, олпатлыҡ. *Мәсем хан, мосолман хан, төрөк заты, талай хандан артыҡ булған солтанаты.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**СОЛТАНАТЛЫ** *с.* Мөһабәт, олпатлы. *Солтанатлы кеше.*

**СОЛТАНЛЫҠ** *и. кар.* **солтанат** 1.

**СОЛТОҠ** *с. диал. кар.* **сомтор** 1. *Солтоҡ ҡойроҡ.*

**СОЛЬ** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* «До» менән башланған музыкаль гамманың бишенсе тауышы, шулай уҡ шул тауышты билдергән нота.

**СОЛЯР** [*рус.* соляровый]: **соляр майы** нефть продукттарының тракторға һәм карап дизелдәренә яғыулыҡ итеп файҙаланылған бер төрө.

**СОЛЯ́РИЙ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡояш ваннаһы ҡабул итеү өсөн йыһазландырылған асыҡ урын.

**СОЛЯ́РКА** [*рус.*] *и. һөйл.* Соляр майы (*кар.* **соляр**). *Бер нисә көн буйы солярка һибеп, өйөмдәр яндырылды.* И. Ғиззәтуллин.

**СОМҒОЛ** *с. кар.* **сөмгөл.**

**СОМРО** *с. диал.* Йомро. [*Ҡотлогилдененң*] *сомро йөҙө оло сырайлы, етди күҙ ҡараштары аҡыллы.* Ж. Кейекбаев.

**СОМТА́ЙТЫУ** *ҡ. һөйл.* Әҙгә ҡалдырыу, әҙәйтеү; наҡыҫлау.

♦ **Ҡойроҡто сомтайтыу** аҡылға ултыртыу, ҡыҫыу.

**СОМТА́ЙЫУ** *ҡ. һөйл.* Әҙгә ҡалыу, әҙәйеү, наҡыҫланыу. *Тауыҡ еме сомтайҙы.*

**СОМТОР** *с.* **1.** Тейешле оҙонлоҡтан ҡыҫҡа булған йәки өҙөлгән (ҡойроҡҡа ҡарата). *Сомтор ҡойроҡло һыйыр.* ■ [*Хәбибуллин*] *сомтор һыйыры янына барып, уны бәйҙән ысҡындырҙы.* Х. Ғиләжев. *Ә болондан сабып бара сомтор ҡойроҡ бер ҡолон, ат булғансы ял-ҡойроғо булыр әле бик оҙон.* С. Әлибаев. **Сомтор һарыҡ** ҡыҫҡа ҡойроҡло һарыҡ.

**2.** Ғәҙәттәге оҙонлоҡтан кәм булған; ҡыҫҡа. *Сомтор ағас. Сомтор сәс. Сомтор төн.* ■ *Әсәһе Нәғимә, ҡыҙын кейендерҙе, яһандарҙы, сәсен тарап, сомтор толом остарына күк таҫмалар үрҙе.* Б. Бикбай. [*Сөнәғәтуллиндың*] *подвал тәҙрәһенең цемент төпһаһында өҫтөнә иҫке сомтор сәкмәнен ябынып йоҡлап йөрөүенә лә ике-өс көн генә үткәйне.* В. Нафиҡов.

**3.** *күсм.* Тейешле дәрәжәнән кәм; әҙ. *Ҡай бирәүҙәр фәҡәт йөҙгә ҡыҙыға, ғашиҡ була улар күҙ-ҡашҡа. Сомтор аҡыл менән кинәт уйлап, барып башын бәрә ҙур ташҡа.* Б. Вәлит. *Ғәбделғәзиз .. барҙы онотор, юҡты тентер, мәғәнә сомтор, тел — ләзиҙ.* Ш. Бабич.

♦ **Сомтор ай** *кар.* **ай** [1] 3.

**СОМТОРА́ЙЫУ** *ҡ.* Сомторға әйләнеү, ҡыҫҡарыу. *Һыу буйы тиғайҙарында һеҙ унда-бында сомторайып, мөтөрләнеп бөткән тупаҡ өйәнкеләрҙе, ҡарамаларҙы күргеләрһегеҙ. Тол ҡатындарҙың аҙмышын аңлағандай улар.* Х. Назаров.

**СОНА́Й** *с.* **1.** Япрағы өҙөлгән йәки ките́лгән (кеше ҡолағына ҡарата).

**2.** Өҙөк йәки китек ҡолаҡлы (кешегә ҡарата). *Сонай кеше.* // *Һарыҡ һатып, кәпәс алған сонайым, һыйыр һатып, кәләш алған сонайым* (Халыҡ йырынан).

**СОНА́ТА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Төрлө темп һәм характерҙағы өс-дүрт өлөштән торған инструменталь музыка әҫәре. *Бетховен сонатаһы.* ■ *Башҡорт далаһының үҙенсә бер сонатаһы һымаҡ ошо йыр.* Ғ. Рамазанов. *Минең иптәш уйнай сонатаһын, мин уҡыйым яңы шиғырҙы.* М. Хәй.

**СОНАТИ́НА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Эшкәртелеше ябай ғына, ҙур булмаған соната.

**СОНҒИ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Яһалма. *Сонғи ебәк. Сонғи шатлыҡ.* ■ *Ғәлиәнең нурлы йөҙө*

*ундай сонги матурлыкка мохтаж түгел.* Ә. Иҫәнбирҙин. *Күк йөҙөндә күлъяулыҡ киҫәгендәй ҙә болот юҡ. Тик күтәрелгән пар томаны ғына, сонги болот һаҡ, Иҙел буйлап түбән төшөп китә.* И. Насыри.

**СОНЕ́Т** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* Ике дүрт юллыҡ һәм ике өс юллыҡ шиғырҙан торған ун дүрт юллыҡ шиғыр формаһы. *Рус сонеттары. С. Кулибай сонеттары. Шекспир сонеттары.*

**СОНОР** [*рус.* сонорный ⟨*лат.*]: **сонор өндәр** *лингв.* әйтелештәрендә тауыш өҫтөнлөк иткән тартынҡы өндәр (р, л, м, н).

**СОНТАЙТЫУ** *ҡ. кар.* **сомтайтыу.**

**СОНТАЙЫУ** *ҡ. кар.* **сомтайыу.**

**СОНТОҠ** *с. диал.* Сомтор. *Сонтоҡ ҡойроҡ. Сонтоҡ сәс.*

**СОНТОР** *с. диал.* Сомтор. *Сонтор сапан. Сонтор тун.*

**СОҢҒОЛ** *с. диал.* Сөмгөл.

**СОҢҠА** [1] *и.* **1.** Баш һөйәгенең арт яҡтан тупайып торған өлөшө; сәкәк. *Соңҡа һөйәге.* ■ *Мансур ағай кепкаһын соңҡаһынан кире маңлайына төшөрөп кейҙе.* К. Мәргән. *Юлбарыҫтың хужаһы пограничник уның [сик боҙоусының] соңҡаһына прикладын ҡундырып өлгөрҙө.* С. Кулибай.

**2.** Тауҙың иң бейек урыны; түбә. *Шотт баяры килеп ултырғас, урманды ҡырҡтырған да тауҙың соңҡаһында ғына ҡуш ҡайын ҡалдырған.* Б. Хәсән. *Болоттарға терәп ҡаҡ соңҡаңды, һәр саҡ мәғрур тор һин, Ирәндек.* А. Игебаев.

**СОҢҠА** [2] *с. диал.* Сөмгөл.

**СОҢҠАЙЫУ** *ҡ.* Сурайып (1 мәғ.) ҡалҡыу. *Күҙҙәре өңрәйеп эскә батҡан, яңаҡ һөйәктәре соңҡайып сыҡҡан балалар .. йәш түгеп илап ҡала.* Н. Ҡәрип.

**СОҢҠОУ** *ҡ.* Баш түбән ҡолау йәки һикереү. *Һыуға соңҡоу.*

**СО́ПКА** [*рус.*] *и.* **1.** Байкал артында һәм Алыҫ Көнсығышта түңәрәк түбәле ҡалҡыулыҡ йәки тау. *Алдан барған колонна юлдан сығып, ике сопка араһындағы тәрән үҙәккә боролдо.* С. Кулибай. *Манжур сопкалары — мәшһүр сопка, дошман яҡта сопка артында.* Х. Ҡунаҡбай.

**2.** Камчаткала һәм Курилъ утрауҙарында вулкан, шулай уҡ Ҡырымда һәм Кавказда ләмле вулкан. *Ключевский сопкаһы.*

**СОПЛО́** [*рус.*] *и. тех.* Шыйыҡлыҡ, пар, газдың бәреп сығыу тиҙлеген арттырыу һәм билдәле йүнәлеш биреү өсөн нәҙегәйтеп ҡуйылған торба өлөшө. *Турбина соплоһы.*

**СОПРА́НО** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* **1.** Иң нәҙек ҡатын-ҡыҙ тауышы. *Драматик сопрано. Колоратур сопрано. Лирик сопрано.* / *һөйл.* Шундай тауыш менән йырлаған йырсы ҡатын.

**2.** Күп тауышлы музыкаль әҫәрҙәге иң нәҙек (беренсе) тауыш.

**СОР** [1] *с. диал.* Дөрөҫ, тапҡыр. *Уның төшө бик сор була торған.* // [*Ишемгол*] *сор ҡарап, баҫып тора ине.* С. Ҡудаш.

**СОР** [2] *и.*, **сор ҡурай** Һыҙғыртып уйнай торған ҡыҫҡа ҡурай; бисәләр ҡурайы, һыбыҙғы. *Таштуғайҡай, һинең ҡамышыңдан сор ҡурайҙар яһап тартайым* (Халыҡ йырынан).

**СОР** [3], **сор-р** *оҡш.* Ҡош-ҡорт тамағынан йәки һыҙғыртҡыс һыҙғыртҡанда һ. б. ҡалтырап сыҡҡан ҡалыныраҡ тауышты белдергән һүҙ. *Сор итеү. Сор итеп ҡалыу.*

**СОРА́ТНИК** [*рус.*] *и.* Көрәштәш.

**СОРБИ́Т** [*рус.*] *и.* Диабет менән ауырығандар аҙығында файҙаланыла торған глюкозаһыҙ шәкәр.

**СОРҒАУ** *ҡ. диал.* Сорғотоу. *Туп сорғау.*

**СОРҒОЛОУ** *ҡ. төш. кар.* **сорғоу.**

**СОРҒОТОУ** *ҡ.* Юғарыға, үргә ырғытыу; һикертеү, атыу. *Һауаларға уҡ сорғоттом, ҡарлуғасҡа тейҙе уҡҡынам.* Салауат Юлаев. *Сәкән һуҡтыҡ, туп сорғоттоҡ, йәшенмәктәр уйнаныҡ.* А. Игебаев.

**СОРҒОУ** *ҡ.* Көс менән юғарыға, өҫкә атылыу. *Ҡауырһын йәбештерелгән уҡ үргә сорғоп, ҡошто үтә сығып китте.* Р. Ниғмәти.

**СОРҠА: ҡырҡ сорҡа** тишкеләнеп, туҙып йәки сереп бөткән. *Ҡырҡ сорҡа ҡалай.* ■ *Өйҙөң ҡыйығындағы туҙып бөткән ҡырҡ сорҡа таҡталар .. сереп, бәҫәреп .. ҡарағусҡыл йәшел төҫкә әйләнгәндәр.* Ғ. Дәүләтшин.

**СОРҠОЛДАЙ** *и. диал.* Күмәгәй.

**СОРЛАТЫУ** *ҡ. кар.* **соролдатыу** 2.

**СОРЛАУ** [1] *ҡ.* **1.** Сор [3] итеп ҡысҡырыу; сор итеү, соролдау. *Тәлмәрйен сорлай.* ■ *Иркен баҫыу. .. Матур йәй иртәһе. Тирә-яҡта ҡоштар сорлайҙар.* Ғ. Мәсғүт. *Ялан еркәйенең буҙ турғайы һауаларға сыҡмай сорламай* (Халыҡ йырынан).

**2.** Сор иткән тауыш сығарыу; соролдау. *Тамаҡ сорлай. Эсе сорлай, ашарға һорай.*

**СОРЛАУ** [2] *ҡ.* Нәҙек кенә булып, туҡтауһыҙ ағыу (ҡа́н, йәш һ. б. нәмәгә ҡарата). *Танауҙан сорлап ҡан аға. Шишмә сорлап аға.* ■ *Салих уны ҡосаҡлап алды: — Васька, илама! Илама! .. Ә үҙенең күҙенән сорлап йәш аға ине.* Х. Мохтар. *Офицерҙың башынан сорлап ҡан китте.* Һ. Дәүләтшина.

**СОРЛО** *с. диал.* Дөрөҫ, тапҡыр. *Уның төшө бик сорло була.*

**СОРНАУ** *ҡ. диал.* **1.** *кар.* **сырмау** [1]. *Башты яулыҡ менән сорнау. Еп сорнау.* ■ *Ул арҡанды ҡулына сорнаны.* А. Ғирфанов.

**2.** *диал. кар.* **солғау** 3.

**СОРОЛДАТЫУ** *ҡ.* **1.** Сор-сор итеп ҡысҡыртыу. *Соролдатып ҡыуыу.*

**2.** Сор-сор иткән тауыш сығартыу; сорлатыу. *Соролдатып һыбыҙғы ҡысҡыртыу.* ■ *Төрмә ишеге алдында, ишек эргәһендә, төрмә эсендә шау-шыу ҡупты, нимәләрҙер ватылды, кемдер һыҙғыртҡыс соролдата башланы.* А. Таһиров.

**СОРОЛДАУ** *ҡ.* **1.** Сор-сор ҡысҡырыу; сор-сор итеү, сор-сор килеү. *Баҡа уртына тын тултырып, соролданы, ти* (Әкиәттән).

**2.** Сор-сор иткән тауыш сығарыу; сорлау. [*Ат*] *ас ҡеүек булһа ла, биргән бесәнде йүнләп ашамай, ашағанда тештәре сиҡылдап, эскәндә тамағы соролдап китә.* Ғ. Ишбулатов.

**СОРОЛДАШЫУ** *ҡ. урт. кар.* **соролдау 1.** *Ҡайҙалыр аҫтараҡ тәлмәрйендәр соролдаша.* Х. Ғиләжев.

**СОР-СОР** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат сор иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сор-сор итеү. Сор-сор килеү. Сор-сор ҡысҡырыу.*

**СОРТ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Берәй тауарҙың, аҙыҡтың сифат, хаҡ менән билдәләнгән төрө, категорияһы. *Беренсе сорт он. Икенсе сортлы сәй. Юғары сорт бұҫтау. Сорттарға айырыу.* ■ *Беҙ Асҡарға барып, триерҙы ҡул менән әйләндереп, орлоҡто сорттарға бүлеп ҡайта инек.* Ғ. Ишбулатов. / Тауарҙың йәки ашамлыҡтың эшләнеше йәки материалы менән билдәләнгән төрө. *Прокат сорттары. Туҡыма сорты.* ■ [*Йәнтимерҙең*] *кеҫәһенән яҡшы сорт папирос ҡабы күренеп тора.* С. Агиш. *Ҡымыҙҙы баштан уҡ төрлө сорт итеп яһап була.* М. Ғөбәйҙуллин.

**2.** Сәсеп үҫтерелгән үҫемлектең хужалыҡ яғынан әһәмиәт тотҡан төрө. *Ҡорога сыҙамлы сорт. Мул уңышлы сорт. Районлаштырылған сорт.*

**СОРТИРОВКА** [*рус.*] *и. кар.* **сортлағыс.**

**СОРТЛАҒЫС** *и.* Игенде, йәшелсәне сифаты, эрелеге буйынса сортҡа айыра, таҙарта торған машина; сортировка. *Картуф сортлағысы. Иген сортлағысы. Һуған сортлағысы. // Сортлағыс машина.*

**СОРТЛАУ** *ҡ.* Сортҡа айырыу. *Балыҡ сортлау. Картуф сортлау. Иген сортлау.*

**СОРТЛАУСЫ** *и.* Сортлау менән шөғөлләнгән кеше.

**СОРТЛЫ** *с.* **1.** *махс.* Билдәле (ғәҙәттә юғары) сортҡа (1 мәғ.) ҡараған. *Сортлы быяла. Сортлы он. Сортлы сәй.*

**2.** *а. х.* Ҡиммәтле, юғары сифатлы сортҡа (2 мәғ.) ингән; сифаты юғары тип һаналған. *Сортлы бойҙай. Сортлы картуф. Сортлы һуған.* ■ *Хужалыҡ район .. колхоздарына 24 мең центнер сортлы орлоҡ бирҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1980, 16 сентябрь.

**СОРТҺЫҘ** *с.* **1.** Түбән сортҡа (1 мәғ.) ҡараған. *Сортһыҙ икмәк. Сортһыҙ он. Сортһыҙ сәй.*

**2.** Түбән сифатлы сортҡа (2 мәғ.) ингән; сифаты түбән һаналған. *Сортһыҙ бойҙай. Сортһыҙ картуф. Сортһыҙ һуған.*

**СОРҺОҘ** *с. диал.* **1.** *кар.* **ваҡытһыҙ.** [*Ҡолтуғә — Сафыяға:*] *Бүлдем, ахыры, татлы уйығыҙҙан. .. Сорһоҙ килдем.* Б. Бикбай.

**2.** Тыйнаҡһыҙ, тәрбиәһеҙ. *Сорһоҙ бала. // Сорһоҙ ҡыланыу.*

● *Ҡунаҡтың сорһоҙо килә белмәҫ, килһә, китә белмәҫ.* Әйтем.

**СОС** *с.* **1.** Тиҙ генә төшөнөп, етеҙ эшләүсән; булдыҡлы, уяу. *Сос егет. Эшкә сос. // Эшкә сос тотоноу.* ■ *Алышта ла, көрәштә лә көс кенә түгел, таҫыллыҡ та кәрәк. Сос бул, үҙеңде лә курсыла, яҡын яраныңды ла онотма.* Ғ. Хөсәйенов. *Беҙҙең затҡа оҡшапмылыр, сос күренә был бала. Командир булыр, моғайын,— атлап йөрөүен ҡара.* С. Кулибай.

**2.** Тиҙ генә һиҙеп алыусан; һиҙгер. *Сос ҡуҙ. Сос ҡолаҡ.* ■ *Әсә күңеле сос була бит ул, минән хәлдең дөрөҫөн шул көндө уҡ һөйләтте.* Н. Мусин. *Бәрҙе бик сос балыҡ ул. Һағырак йөрөмәһәң, тотормон тимә.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** Бик йылдам, етеҙ хәрәкәтле. *Етеҙ, сос алтын ҡуян. Һине тотоп алһа, нисек шатланыр ине Юлан!* Ә. Әхмәтҡужин. *Бәрәс үҙе бик сос икән, тояҡтары тос икән.* А. Игебаев.

**СОСАЙТЫУ** *ҡ.* Тиҙ һиҙеп алыусанға әйләндереү; сос (2 мәғ.) итеү. *Ҡолаҡты сосайтыу.*

**СОСАЙЫУ** *ҡ. кар.* **сосланыу.** *Сосайып алыу.*

**СОСЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Тиҙ төшөнөп, тиҙ эшләүсәнгә әйләнеү; сос (1 мәғ.) булыу; сосайыу. *Сосланып китеү. Улың эшкә бик сосланған икән.*

**2.** Тиҙ һиҙеп алыусанға әйләнеү, сос (2 мәғ.) булыу. *Ҡолағы сосланған. Күҙе сосланған — күреп тә алды.*

**СОСЛОВИЕ** [*рус.*] *и.* Феодализм дәүерендәге синфи мөнәсәбәттәр шартында барлыҡҡа килеп, закон нигеҙендә мираҫ хоҡуғы һәм бурыстарына эйә булған социаль төркөм. *Түбән сословие. Өҫтөн сословие. Дворян сословиеһы. Сословие хоҡуғы.* ■ *Башҡорттар 1798 йылда хәрби сословиеға күсерелә, хеҙмәткә йәлеп ителә.* М. Хисмәтов.

**СОСЛОВИЕЛЫ** *с.* Йәмғиәттең сословиеларға бүленешенә нигеҙләнгән; сословиеға бүленгән йәмғиәткә хас. *Сословиелы дәүләт. Һайлауҙың сословиелы системаһы.*

**СОСЛОҠ** *и.* **1.** Кешенең тиҙ төшөнөп, тиҙ эшләү һәләте; булдыҡлылыҡ, етеҙлек. [*Туҡтаров:*] *Ни эшләргә был халыҡ менән — тегеләй ҙә алдырып булмай, былай ҙа. Ярай әле үҙемдең сослоҡ етә. Тағы ярты сәғәт һуңлағанда, хатым завод директорын эҙләп тә киткән булыр ине.* Я. Ҡолмой.

**2.** Тиҙ генә һиҙеп алыусанлыҡ; һиҙгерлек. [*Дауытов:*] *Әгәр дошманды еңергә теләһәң, һуҡ. .. Мин идеология тураһында әйтмәйем, ә оперативлыҡ, сослоҡ тураһында һөйләйем.* Б. Бикбай.

**3.** Йылдамлыҡ, етеҙлек (эш, хәрәкәткә ҡарата). [*Ҡарт:*] *Бына, балам, ат урлау ҙа шундай сослоҡ һәм хаҡлыҡ һорай.* Ғ. Әмири. *Гөлйөҙөмдө аш яғынан түрьякка йыш сығармаҫҡа тырыштылар. Был тәңгәлдә инде Муллайән сослоҡ күрһәтте — йүгерә-йүгерә аш ташыны.* Ф. Иҫәнғолов.

**СОСМОРАУ** *ҡ. диал.* Сосолоу.

**СОСОЛДОРОУ** *ҡ.* Оҙон итеп һалындырыу; һалбыратыу, сосолтоу. *Ҡулдәкте сосолдороу. Еңде сосолдороу.* ■ *Ольга сосолдороп һөйрәткән оҙон ҡулдәк салғыйҙырын тапай-тапай .. ҡунаҡ өйөнә инеп юғалды.* Т. Хәйбуллин.

**СОСОЛОУ** *ҡ.* Оҙон булып һалыныу; һалбырау. *Ҡулдәк итәге сосолоп төшкән.* ■ *Фатима мамыҡ шәле аҫтынан сосолоп торған сәсен тиҙ генә ипләп, .. тышҡа атланы.* Б. Бикбай. *Һыйыр, ауыҙынан сосолоп торған бесән шәлкемен ялпылдатып, .. беҙҙе яларөсөн оҙон телен сығарҙы.* Й. Солтанов.

**СОСОЛТОУ** *ҡ. кар.* **сосолдороу.** [*Бай бисәһе:*] *Ул ҡулдәкте сосолтоп һөйрәп йөрөгәнсә, бөрмәңә ҡыҫтырып булмаймы?!* Т. Хәйбуллин.

**СОСРАТЫУ** *ҡ.* Ялбыратып аҫҡа һалындырыу; һалбыратыу. *Еңде сосратыу.*

**СОСРАУ** *ҡ.* Ялбырап, аҫҡа һалыныу; һалбырау. *Ултырғыс арттарында ботай-сатай ҡулдәктәр, .. юбкалар, таҫтамалдар, тағы әллә нимәләр сосрап тора.* З. Биишева.

**СОСТАВ** [*рус.*] *и.* **1.** Ҡатмарлы бер бөтөндө барлыҡҡа килтергән нәмәләр, өлөштәр йыйымы. *Телдең һүҙлек составы (лексикаһы) менән грамматик төҙөлөшө уның нигеҙен тәшкил итә.*

Ж. Кейекбаев. / Берәй химик берләшмәгә, матдәгә һ. б. уларҙы барлыҡҡа килтергән өлөш булып ингән башҡа төрлө элементтар йыйымы. *Быяланың составы. Матдәнең химик составы. Тупраҡтың составы. Һөттөң аҡһым составы. Һыуҙың составы.*

**2.** Төрлө элементтарҙан, матдәләрҙән торған берләшмә, ҡатышма, иретмә һ. б. *Ағыулы состав. Дарыуҙың составы. Махсус состав менән эшкәртеү.*

**3.** Һаны йәки сифаты яғынан ҡаралған ниндәйҙер ойошманан коллективтан торған кешеләр төркөмө. *Ғәскәрҙең составы. Идара составы. Суд составы. Бюро составына һайлау. Делегация составына индереү.* ■ *Барлыҡ бюро составы ауылдарҙа, колхоздарҙа булғанлыҡтан, ындағы [райкомдағы] эштәрҙе Дауытовтың бер үҙенә алып барырға тура килә.* Б. Бикбай. **Шәхси состав** ниндәйҙер ойошма, хужалыҡ йәки ғәскәр берәмегендәге бөтә булған кешеләр йыйымы. *Дивизияның шәхси составы. Институттың шәхси составы.* ■ *Урман эргәһендәге аҡланда [дивизияның] бөтә шәхси составы сафҡа баҫҡан.* С. Әлибаев.

**4.** Эше, профессияһы һ. б. буйынса ниндәйҙер категория тәшкил иткән кешеләр. *Етәкселәр составы. Командирҙар составы. Лётчиктар составы. Уҡытыусылар составы.*

**5.** Юлға әҙерләгән йәки рейста йөрөгән вагондар рәте, теҙеме. *Пассажирҙар поезы киткән, тик бишенсе юлда ғына паровозһыҙ тауар составы тора.* Б. Бикбай. *1927 йылдың 12 июнендә булған дәһшәтле ҡойон .. йөк тейәгән тауар составын ауҙарып китә.* Д. Бураҡаев.

♦ **Хәрәкәттәге состав** тимер юлда йәки автомобиль маршруттарында йөрөтөр өсөн ҡулайлаштырылған транспорт саралары. **Енәйәттәр составы** билдәле эш-холоҡто законда енәйәт тип тапҡан саралар йыйымы.

**СОСТАНЛАУ** *ҡ. диал.* Сусанлау.

**СО́ТНИК** [*рус.*] *и. тар.* **1.** Революцияға тиклемге Россияла казак ғәскәрендә регуляр ғәскәрҙәге поручик дәрәжәһенә тиң ғәскәри дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше. / 1798—1868 йылдарҙа, башҡорттарға мәжбүри ғәскәри хеҙмәт индерелгәс, башҡорт ғәскәрендәге поручик дәрәжәһенә тиң ғәскәри дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше. *Француз яуынан ҡайтҡас, Буран-гол Буранбайҙы старшина, үҙенең улы Ҡаһарманды кантон, Бейеште сотник итеп ҡуя.* М. Буранғолов.

**2.** Йөҙ өй башлығы. *Саттар сотник улар [йәштәр] янына барып: «Бар, бар, сығығыҙ инде, сығығыҙ! Сход бөттө, сход ябыҡ,— тип өгөтләй.* Һ. Дәүләтшина.

**СОТОР-СОТОР** *оҡш.* Ҡаҙ, өйрәк бәпкәләре морондарын тиҙ-тиҙ йөрөтөп, һыу эскәндәге тауышты белдергән һүҙ. *Сотор-сотор итеү. Сотор-сотор килеү.*

**СОТРУ́ДНИК** [*рус.*] *и. ҡар.* **хеҙмәткәр.**

**СО́ТСКИЙ** [*рус.*] *и. тар.* Революцияға тиклемге Россияла: ауыл полицияһына крәҫтиәндәр араһынан һайлап ҡуйылған түбәнге дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше. *Ауылдың ҡуйкалдары, сотскийҙары .. нисек тә булһа түрә янына инеп, уларға үҙҙәрен иң егәрле итеп күрһәтеп, ниндәй генә йомош булмаһын — башҡарырға .. әҙер торған кешеләр ине.* Т. Хәйбуллин.

**СО́УС** [*рус.*] *и.* Ашамлыҡҡа һалына торған шыйыҡ тәмләткес. *Майонез соусы. Томат соусы. Һуған соусы.* ■ *Ҡурылған балыҡ гарнирына ҡыяр, помидор теленгән ниндәйҙер бик тәмле соус та һалынған.* Ф. Иҫәнғолов.

**СОФА́** [*рус.* ⟨ *фр.* ⟨ *ғәр.*] *и.* Арт һәм эргә яҡтары бер тигеҙ бейеклектә булған киң тәпәшәк диван.

**СОФИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Теге йәки был күренештең айырым яҡтарын әләктереп алыуға, аңлы рәүештә төрлөсә аңлашылған төшөнсәләрҙе ҡулланыуға һ. б. нигеҙләнгән, логик төҙөлөшө формаль дөрөҫлөк артына ышыҡланған ялған фекер.

**СОФИ́СТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Үҙ фекерен иҫбатлау өсөн софизмға таянған кеше.

**СОФИСТИК** *с.* Софизмға ҡоролған. *Софистик фекер.*

**СОФИ́СТИКА** [*рус.*] *и.* Софизмға нигеҙләнгән уй-фекер, шулай уҡ юлдан яҙҙырған, бутаған хәйләле һүҙҙәр.

**СОХАРЫЙ** [*рус.* сухарь] *и.* Киптерелгән икмәк киҫәге; шөкәрә, кәтермәс. *Мин Аняға шәкәр, сохарый birҙем. .. Ул шытырлатып ашай башланы.* С. Кулибай.

**СОЦИА́Л-ДЕМОКРА́Т** [*рус.*] *и.* Социал-демократия (1 мәғ.) яҡлы кеше. *1905 йыл еҫе сығыу менән Тоҙтүбәгә һөргөнгә ебәрелгән революционерҙар социал-демократтар түңәрәге ойоштороп, эшселәр араһына инеп, эшләй башлаған.* З. Шәрҡи. / Социал-демократик партия ағзаһы. *В. И. Ленин Өфөлә урындағы һәм ситтән килгән социал-демократтар менән осраша.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 21 ғинуар.

**СОЦИА́Л-ДЕМОКРАТИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Социал-демократияның идеологияһы һәм тактикаһы.

**СОЦИАЛ-ДЕМОКРАТИК** *с.* Социал-демократияға, социал-демократтарға мөнәсәбәтле. *Социал-демократик ҡараш. Социал-демократик хәрәкәт. Социал-демократик партия.* ■ *Өфө губернаһында беренсе башлап туған телдә «Алға» исемле социал-демократик газета сыҡты.* «Ағиҙел», 1967, № 8.

**СОЦИА́Л-ДЕМОКРА́ТИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.* ⟨ *лат.*+ +*гр.*] *и.* **1.** Хәҙерге халыҡ-ара эшселәр хәрәкәтендә буржуазия менән синфи теләктәшлеккә юл тотҡан ағым.

**2.** Социал-демократик партияларҙың дөйөм исеме. *Немец социал-демократияһы. Россия социал-демократияһы.*

**СОЦИАЛИЗАЦИЯЛАУ** *ҡ. ҡар.* **социаллаштырыу.**

**СОЦИАЛИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* **1.** Коммунизмдың беренсе йәки түбәнге фазаһы — капитализмды алмаштырып, етештереү сараларын йәмғиәт милкенә әйләндергән, кешенең кешене иҙеүен бөтөргән, бөтә йәмғиәт кимәлендә планлы тауар етештерелеше урынлаштырған һәм «һәр кемдән — һәләтенсә, һәр кемгә — хеҙмәтенсә» тигән принципты тормошҡа ашырған ижтимағи ҡоролош. *Социализм илдәре. Социализм төҙөү.*

**2.** Социалистик йәмғиәт төҙөү тураһындағы тәғлимәт. *Фәнни социализм.* ■ *Маркс һәм Энгельс ижад иткән фәнни социализм революцион эшселәр хәрәкәтенең теорияһы һәм программаһы булып тора.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 10 апрель.

**3.** Бөтә нәмәне тигеҙләү һәм антагонистик ҡаршылыҡтарҙы йомшартыу нигеҙендә капиталистик йәмғиәткә реформа яһау яғында торған төрлө ваҡ буржуаз һәм буржуаз тәғлимәттәрҙең исеме. *Буржуаз социализм. Народниктар социализмы. Христиандар социализмы.*

♦ **Утопик социализм** йәмғиәт үҫешенең закондарын белеүгә һәм уны алға алып барған көстәргә таянмай идеаль йәмғиәт төҙөү, йәмғиәтте социалистик башланғыста нигеҙенән үҙгәртеп ҡороу тураһындағы тәғлимәттәр.

**СОЦИАЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* **1.** Социализм (2 мәғ.) яҡлы кеше.

**2.** Социал-демократик партия ағзаһы.

**СОЦИАЛИСТИК** *с.* **1.** Социализмға (1 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Социалистик етештереү ысулы.* / Йәмғиәтте социализм принциптары нигеҙендә үҙгәртеп ҡороуҙы маҡсат итеп ҡуйған. *Социалистик үҙгәртеп ҡороу.* ■ *Капиталистар, Рәсәйҙең бөтә ҡара көстәрен туплап алып, .. социалистик революцияның утын, ялҡынын ҡан менән баҫтырырға керештеләр.* Һ. Дәүләтшина. *Империализм һуғышынан тыуған объектив шарттар кешелек донъяһын .. йә тағы ла миллиондарҙы һәләкәткә бирергә, йә мәҙәни илдәрҙә бөтә власты революцион пролетариат ҡулына тапшырып, социалистик алмашыныуҙы тормошҡа ашырырға тигән һорау алдына* [*ҡуйҙы*]. Д. Юлтый.

**2.** Социализм (2 мәғ.) принциптарына нигеҙләнгән, социализм принциптарына ҡоролған. *Социалистик дәүләттәр. Социалистик ҡоролош.* / Социализм принцибына ҡоролған йәмғиәткә хас. *Социалистик законлыҡ. Социалистик индустриализация. Социалистик хужалыҡ системаһы.*

**3.** Социализм (2 мәғ.) идеяһы менән һуғарылған, социализм принцибына яуап биргән. *Социалистик аң. Социалистик тәрбиә.*

**4.** Социал-демократияға (1 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Социалистик партия.*

♦ **Социалистик ярыш** *ҡар.* **ярыш.**

**СОЦИАЛЛАШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **социаллаштырыу.**

**СОЦИАЛЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Социалистик йәмғиәт милке итеү. *Хужалыҡты социаллаштырыу.*

**СОЦИАЛЬ** [*рус.* социальный] *с.* **1.** Кешенең йәмғиәттәге тормошона һәм үҙ-ара мөнәсәбәтенә бәйле, йәмғиәткә мөнәсәбәтле; ижтимағи. *Күренештәрҙең социаль сәбәптәре. Социаль прогресс. Социаль үҫеш. Социаль фәндәр.* / Йәмғиәттең синыфтарға бүленеүе тыуҙырған. *Социаль ҡаршылыҡтар. Социаль төркөмдәр. Халыҡтың социаль составы.* ■ *Ғәлиәбаныу, ул осорҙағы меңләгән татар һәм башҡорт ҡыҙҙары кеүек, икеләтә социаль иҙеү шарттарында йәшәй.* З. Шәрҡи. / Теге йәки был ижтимағи ҡоролош, среда йәшәгән тормош шарттары тыуҙырған. *Социаль мораль.* ■ *Ауыр тормош шарттары* [*Башҡортостанда*] *социаль ауырыуҙар (туберкулёз, трахома һ. б.) таралыуына киң юл асты.* М. Хисмәтов. / Шул тормош шарттарын сағылдарған. *Социаль роман.*

**2.** Йәмғиәттәге етештереүсе мөнәсәбәттәрҙе үҙгәртеүҙе маҡсат итеп ҡуйған. *Социаль көрәш. Социаль һынылыш.*

♦ **Социаль страхование** һаулыҡҡа зыян килгән, ҡартайған һ. б. осраҡтарҙа дөйөм материаль фондтан ярҙам күрһәтеү системаһы.

**СОЦИО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Социология буйынса белгес. *Байтаҡ мәсьәләләр буйынса Башҡортостандағы вульгар социологтар милләтселәргә яҡын ине.* Ә. Харисов.

**СОЦИОЛОГИК** [*рус.*] *с.* Социологияға мөнәсәбәтле. *Социологик закон. Социологик теория. Социологик тикшеренеүҙәр.*

**СОЦИОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Дөйөм йәмғиәттең һәм уның эсенә ингән айырым системаларҙың тормош һәм үҫеш закондары тураһындағы фән.

**2.** Теге йәки был ижтимағи институтҡа, йәмғиәт тормошоноң билдәле бер өлкәһенә ҡағылышлы мәғлүмәттәрҙе өйрәнгән фән бүлеге. *Ҡала социологияһы. Сәнғәт социологияһы. Хеҙмәт социологияһы.*

**СОЮ́З** [*рус.*] *и.* **1.** Айырым кешеләр, төркөмдәр, йәмғиәттәр, синыфтарҙың һ. б. тығыҙ бәйләнеше, берҙәмлеге. *Халыҡтарҙың туғандаш союзы. Эшсе һәм крәҫтиәндәр союзы.*

**2.** Бергәләп эшләү йәки башҡа маҡсат менән ойошмалар һәм дәүләттәрҙең үҙ-ара килешеп берләшеүе. *Дипломатик союз. Ғилми-техник союз. Хәрби союз.* ■ *Өфөлә .. һайланыу буйынса совет һәм сауҙа хеҙмәткәрҙәре союзының идара ағзаһы булып эшләнем.* Т. Йәнәби.

**3.** Бер нисә дәүләттән, ҡәбиләнән, ырыуҙан һ. б. торған дөйөм юғары власлы дәүләт берләшмәһе. *Австралия Союзы.* ■ *Бөтә Союз буйынса сәсеүгә әҙерлектең ун көнлөгө башлана.* Б. Бикбай. *Беҙҙең был Башҡортостанда ғына түгел, бөтә союзда маҡтала бит.* З. Биишева. *«Артек» лагерына бара улар [пионерҙар] киң Союздың төрлө еренән.* Ғ. Сәләм.

**4.** Ижтимағи ойошма, берекмә. *РСФСР художниктар союзы.* ■ *Бәхет һиндә, батраҡ, үҙ ҡулыңда. Ташла, ул йырҙарҙы йырлама! Союзға бар, һора кәрәгеңде, бәхетеңде байҙан әҙләмә.* Б. Ишемғол. *Отпускыға бергә китербеҙ. Күрерһең Мәскәүҙе, Ҡырымды. Путёвка бирмәксе булды союз.* Ғ. Сәләм.

**СОЮЗДАШ** *с.* Дөйөм бер союз (3, 4 мәғ.) эсендәге. *Союздаш республикалар. Союздаш илдәр.*

**СО́Я** [*рус.* ⟨ *яп.*] *и.* **1.** Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған баҫыу үҫемлеге (орлоғо аҙыҡ промышленносында май, һөт, он һ. б. әҙерләү өсөн ҡулланыла).

**2.** Шул үҫемлектең борсағы. *Соя майы. Соя оно.*

**СӨАЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һорау. *Сөал алыу. Сөалға яуап биреү.* ■ *Әсмә уға: «Унда тағы ниҙәр эшләнең?» — тип сөалдар бирә.* М. Ғафури. *Хәлфә әйтте: «Ҡамсыламаҫмын, сөалға бир яуап — ҡайһы көндә киҫһәң тырнаҡты, була бик күп сауап?»* Ш. Бабич.

**СӨБӨР** *окш.* Һыу йәки бүтән шыйыҡлыҡтың нәҙек кенә булып нимәлер өҫтөнә йәки өҫтөнән яй ғына аҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Сөбөр итеп ағыу.*

**СӨБӨРЛӘТЕҮ** *к.* Сөбөр иттереү. *Сөбөрләтеп һыу ағыҙыу.*

**СӨБӨРЛӘҮ** *к.* Сөбөр итеү, сөбөр-сөбөр килеү. *Сөбөрләп аҡҡан шишмә.* ■ *Таш араларынан сөбөрләп .. ятҡан һалҡын шишмә һыуын [әбей] сүмес менән биҙрәләренә тултырҙы.* Х. Кәрим. *Күлдән аша атлап сығырлыҡ ҡына Шүлгән исемле йылға сөбөрләп кенә ағып сыға.* Н. Мәжитов.

**СӨБӨР-СӨБӨР** *окш.* Ҡабат-ҡабат сөбөр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сөбөр-сөбөр һыу аға.*

**СӨГӨЛДӨР** *и.* **1.** Алабута һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, тамыры ашамлыҡ һәм мал аҙығы итеп, айырым бер сорты шәкәр етештереүҙә ҡулланылған яҫы эре япраҡлы йәшелсә. [*Нуруллла менән Мәхүп*] *алты түтәлдәге сөгөлдөрҙән ҡотороп үҫкән уңыш алдылар.* С. Ҡудаш. *Был түтәлдә яҙ көнө сәскәйнек беҙ сөгөлдөр. Быныһы уның ағылыр, ә быныһы — ҡыҙылдыр, ағы булыр аҡ шәкәр, ҡыҙылынан аш бешер.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Шул үҫемлектең ҡуйы ҡыҙыл йәки аҡ төҫтәге ашауға яраҡлы тамыры. *Сөгөлдөр салаты. Сөгөлдөр ташыу.* **Аш сөгөлдөрө** кеше ашай торған ҡыҙыл сөгөлдөр. **Мал сөгөлдөрө** мал ашай торған аҡ сөгөлдөр. **Шәкәр сөгөлдөрө** шәкәр яһай торған эре аҡ сөгөлдөр.

**СӨГӨЛДӨРСӨ** *и.* Сөгөлдөр үҫтереүсе. *Сөгөлдөрсөләр бригадаһы.*

**СӨГӨЛДӨРСӨЛӨК** *и.* Сөгөлдөр үҫтереү эше. *Сөгөлдөрсөлөк совхозы. Сөгөлдөрсөлөк менән шөғөлләнеү.*

**СӨГӨН** *и диал.* Суйын.

**СӨГӨРМӘ** *и иҫк.* Металл баш кейеме; каска. *Ике миллионер баштарына сөгөрмә, өҙтәренә сапан кейеп, билдәренә .. киң ҡайыш бәйләгән.* А. Таһиров.

**СӨГӨРМӘК** *и.* Һыуҙың өйөрөлөп ятҡан сөмөкәй урыны. *Сөгөрмәккә төшөү.*

**СӨГӨРМӘКЛӘНЕҮ** *к.* Сөгөрмәккә әйләнеү, сөгөрмәкле булыу. *Сөгөрмәкләнеп ағыу.* ■ *Килә ҡойон .. ҡарайып ҡуҡкә олғашып, сөгөрмәкләнеп, елеп.* Х. Түләкәев.

**СӨГӘ** *и.* Бикре һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған бик ҡиммәтле аулау балығы. *Сөгә һурпаһы. Сөгә ыуылдырығы. Сөгә тотоу.*

**СӨҘӨН** *и. диал.* Сырай. *Сөҙөнө боҙолған.* ■ *Балаларҙың сөҙөндәре ҡороп, төҫтәре булмау аҡ булмағандан икән.* Ғ. Дәүләтшин.

**СӨЙ** *и.* **1.** Тишеп ҡағып, нимәнелер ҡуша нығыта торған нәҙек ағас. *Рамды сөй менән ҡағып йыйыу.* **Арба сөйө** тәгәрмәс күсәренән ысҡынмаһын өсөн күсәр баштарындағы тишектәргә тығып ҡуйыла торған ағас йәки тимер; сәкүшкә.

**2.** (*йәки* **тимер сөй**) Бер башы ялпаҡ эшләпәле, икенсе башы осло нәҙек тимер; ҡаҙау. *Даға сөйө. Мебель сөйө. Итек сөйө.* ■ *Мыҡты кәүҙәле Яҡуп Мырҙабаев сөйҙәре сыҡҡан ҡалтырлаҡ иҙән таҡталарын һығылдыра баҫып, тышҡа атланы.* Б. Бикбай. *Ҡулға алып таҡта, сөй, һиңә яһап ҡуйҙым өй.* А. Игебаев. **Ҡойроҡ сөйө** буйлыҡтың шөйтөлө осон эләктерә торған сөй.

**3.** Кейем-һалым һ. б. элергә ҡағылған ағас йәки тимер ҡаҙаҡ. *Сөйгә элеү. Сөйҙән алыу. Сөй ҡағыу.* ■ *Ҡарасәс .. сөйҙә элеүле торған еләнен алып бөркәнде.* Ғ. Дәүләтшин. *Аланйолан ҡаранды Сәлим. Сөйҙә атаһының кейемдәре күренмәй. Ҡайтмаған икән әле.* Я. Вәлиев.

**4.** *диал.* Шына. *Балта һабына сөй ҡағыу.* ■ *Ҡусты мулланың салғыһының сөйөн бушата, .. мулла салғыһын нығытмаһын тип, балтаны ҡырға ташлай* (Әкиәттән).

◆ **Ауыҙҙы сөйгә элеү** *ҡар.* **ауыҙ. Ил өҫтөндә имән сөй** бик шәп тә кеше икән, тигән мәғәнәлә кире мөнәсәбәт белдереп әйтелә. *[Фақиһа:] Шаһиәхмәт ҡайнаға ил өҫтөндә имән сөймө әллә ул хәтле. Шәриғәт алдында бөтәгеҙ ҙә тигеҙ.* Ж. Кейекбаев. **Йүкә сөй** нимәгәлер ыңғайлатыр, ниҙер эшләтер өсөн юрамал әйтелгән маҡтау һүҙе. *Уға йүкә сөй килешә.* ■ *[Хөсәйенов:] Беҙҙең ҡолаҡ һеҙҙең вәғәҙегеҙҙән тик ләззәт кенә таба. [Хәҙрәт:] Һин ахмаҡланма, мин .. йүкә сөйгә ireп китә торғандарҙан түгел.* С. Агиш. **Йүкә сөй ҡағыу** *ҡар.* **ҡағыу** [1]. **Ҡырҡ сөйҙөң береһе ҡалмау** бик ныҡ ҡурҡыу. *[Бабай:] Яр башында .. ике ут ялтырай. Утты күргәс, мин ҡойолдом да төштөм, ҡырҡ сөйҙөң береһе ҡалманы.* И. Насыри. **Сөй ҡаҡшау** юғалып ҡалыу, таралып төшөү. *Үткән көнгө вақиғанан һуң сөйҙәре яҡшы уҡ ҡаҡшаған .. хужа уны [Тайновты] яҡты йөҙ менән ҡаршы алды.* И. Насыри. **Сөй өҫтөнә туҡмаҡ** (*йәки* **сүмәлә**) бер насар нәмәгә икенсеһе өҫтәлгәндә әйтелә; бәлә өҫтөнә бәлә. *Бер тананың быҙауы үлә тыуҙы. Тағы сөй өҫтөнә туҡмаҡ: килен гәйепле, ҡарамаған.* Ж. Кейекбаев. **Сөй эҙләү** (*йәки* **табырға тырышыу**) ниндәйҙер юҡ сәбәп табып, бәйләнергә уйлау. *Советҡа төрлөсә ҡараған кеше бар. Үҙҙәренә юл ҡуйылмаған кешеләр сөй табырға тырышып ҡарайҙар, ләкин булдыра алмайҙар.* М. Ғафури. *Айсыуаҡты агроном итеп ҡуйғас, уның һәр эшенән сөй эҙләне Туғаҙаҡ.* Т. Килмөхәмәтов. **Тишек һайын сөй ҡағыу** һөйләгәнде кирегә һаплау, кире мәғәнә биреү. *[Рәми:] Апай, һин, тишек һайын сөй ҡаҡҡандай, һәр һүҙемде ўртәү тип аңлайһың. Һинең менән нисек һөйләшергә лә белмәйем инде.* Х. Мохтар.

**СӨЙҘӨРӨҮ** *к. йөкм. ҡар.* **сөйөү** [1] (1—4 мәғ.). *Граната сөйҙөрөү. Туп сөйҙөрөү.* ■ *Шоңҡар һөйгән һунарсы ҡош сөйҙөрмәй сыҙармы?* «Аҡбуҙат».

**СӨЙҘӘ** *и. диал. ҡар.* **төйҙә** 1. *Балта сөйҙәһе.*

**СӨЙЛӨ** *с.* Сөй менән ҡағылған. *Сөйлө таҡта.*

**СӨЙЛӨГӨҮ** (сөйлөк↗) *к.* **1.** Ҡапыл өҫкә атылыу, сөйөлөү. *Сөйлөгөп китеү.* ■ *Ҡуҡкә сөйлө-*

гөп-сөйләгәп, һайрай һабан тургайы. Р. Солтангәрәев.

2. Капыл сөйөлөп, һикерә биреп, ауыу йәки ауа яҙыу. Күк алаша тертләп алға ынтылды. Акйондоҙ .. капыл артка сайкалып китте, сөйләгәп, сак-сак колап төшмәне. М. Кәрим.

**СӨЙЛӨК: сөйлөк бауы** *диал.* тамаҡбау.

**СӨЙЛӨКТӨРӨҮ** *к.* **1.** Тигеҙ ятмаған йәки нык ултырмаған нәмәнең бер яғына, осона баҫып, һуғып, икенсе яғын, осон капыл өҫкә күтәреү, атыу. *Ғилмениса ни эшләптер кәмәне сөйләктерҙе һәм һыуға салкан йығылды.* Р. Низамов.

2. Хәрәкәт иткән нәмә капыл туктап, йә киреһенсә, капыл куҙғалып, өҫтөндәге нәмәне ауҙарыу, түңкәреү. *Ат капыл куҙғалып китеп һыбайлыны артка сөйләктерҙе.*

**СӨЙЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **сөйләү.** *Сөйләнгән такта. Табаны сөйләнгән итек.*

**СӨЙЛӘҮ** *к.* **1.** Сөй (1, 2 мәғ.) каҡыу, сөй менән нығытыу. *Итек сөйләү. Тактаны сөйләү.*

2. *күсм.* Ыңғайлатыр, эшләтер өсөн юрамал маҡтау; юхалау. *[Әсә:] Ирҙәрҙең .. береһе лә ерле юктан ғына әүлиә булмай. Вакыты менән көйләйһең дә ул ирҙе, сөйләйһең дә. Һәр сак үҙ һүҙеңде генә һүҙ итеп булмай.* Я. Вәлиев. *Йүнгилде карт йүнләп кенә Яугилдегә барғылай һәм йүкәләп, сөйләп кенә ярышырға самалай.* Б. Бикбай.

● *Һөйләп алдырмаған көйләп алдырыр, көйләп алдырмаған сөйләп алдырыр.* Әйтем.

**СӨЙӨЛДӨРӨК** *и. диал.* Тамаҡбау. *Хәмәтша .. аттың алдына сыкты. Мәҙәниә күрмәгәндә, тартып сөйөлдөрөктө систе.* Р. Ғабдрахманов.

**СӨЙӨЛТӨҮ** *к. кар.* **сөйөү** [1]. *Граната сөйөлтөү. Кош сөйөлтөү. Туп сөйөлтөү.*

**СӨЙӨЛӨҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **сөйөү** [1] (1—4 мәғ.). *Төнө буйы күккә ракеталар сөйөлдө.* Ғ. Рамазанов.

2. Киҫкен рәүештә өҫкә күтәрелеү. *Һандуғастарҙың таңғы йырын күккә сөйөлгән һабантурғайҙар моңо алмаштырҙы.* С. Кудаш. *Яҫы кара кашының койорого юғары сөйөлөп тора.* Н. Мусин.

**СӨЙӨРӨЛӨҮ** *к. диал.* Сөйөлөү. *Ботактар сөйөрөлөп, өҫкә ұрмәләй.* ■ *Абдулланың төйөрөм яҫы каштары сөйөрөлгән.* Н. Мусин.

**СӨЙӨРӨҮ** [1] *к.* Ситкә бороу. *Күҙ сөйөрөп бирғән шәрбәттән әрем әсеһе лә татлырак.* А. Игебаев.

♦ **Йөҙ сөйөрөү** (*йәки* **сөйөү**) *кар.* **йөҙ** [1]. *Әй, тыуған ер, минән йөҙөң сөйөр, хөрмәтеңә лайык булмаһам.* Ә. Әхмәткужин.

**СӨЙӨРӨҮ** [2] *к. диал.* Сөйөү [1]. *Кош сөйөрөү. Туп сөйөрөү.* ■ *Бәһлеүәндәрҙе Сәлмән ул сак бала кеүек сөйөргән.* К. Даян.

**СӨЙӨР-СИТНАУ** *и. йыйн. диал.* Сир-сырхау. *Сөйөр-ситнауҙан һакланыу.*

**СӨЙӨРТМӘК** *и.* Таш һ. б. атыр өсөн ике осона резина бәйләнгән саталы ағас. *Сөйөртмәктән атыу.*

**СӨЙӨРТӨҮ** [1] *к. кар.* **өйрөлтөү.** *Ел сөйөртөр көлдө туҙҙырып.* Ә. Әхмәткужин.

**СӨЙӨРТӨҮ** [2] *к. диал.* Сөйөү. *Таш сөйөртөү.*

**СӨЙӨҮ** [1] *к.* **1.** Көс менән ырғытып ебәреү, атып бәреү. *Граната сөйөү. Һөңгө сөйөү. Сөйөп ташлау.* ■ *Улар [фашистар] һауаға яктырткыс ракеталар сөйгән арала .. яктыла подвал төбө нөң күп өлөшө күренә.* Ғ. Әмири. *Алпамыша йығылмай-нитмәй, буҙ толпарға шып итеп ки леп атланды, ти. Икенсеһендә буҙ толпар уны ергә сөйҙө, ти.* «Алпамыша».

2. Көс менән һикертеү, өҫкә ырғытыу. *Бейекке сөйөү. Туп сөйөү.* ■ *Дуғалай бөгөлгән кайын һиртмә тәпеһенән ыскынып, .. мине әллә кайҙа һауаға сөйөп ебәрҙе.* Н. Мусин. *Иптәштәр «ура» кыскырҙы, шаулашып көлөшә башланы, ә мине күтәреп кулдарында сөйҙөләр.* Д. Юлтый.

3. Һунәр кошон йәнлек, кош тибергә осороу, сөйҙөрөү, сөйөлтөү. *Кош сөйөү. Бөркөт сөйөү* ■ *Карсығә ла сөйҙөм өйрәккә, тибә алмай кунды тирәккә* (Халыҡ йырынан).

4. Шәлдең, яулыктың ике осон артка шакарып бәйләү. *Яулыкты сөйөп бәйләү.* ■ *Кафия яулығын сөйөп бәйләне лә, бөйөрөнә таянып, бейеп китте.* Ш. Шәһәр. *Бибисара инәй инәлтеп торманы, артка яҙып сөйгән ҙур яулығын рәтләй-рәтләй, һикегә һәр кемгә мендәрҙәр ташлай башланы.* Ә. Вәхитов.

5. Текә, бейек итеп күтәреү. *Башты сөйөү. Каштых сөйөү. Эйәкте сөйөү.* ■ *Танк .. бер урында тапанып әйләнде лә, туп көбәген өҫкә сөйөп туктаны.* Д. Исламов. *Ғәлиәкбәров артка кайкая биреп, башын юғары сөйөп, тамағын кыра-кыра папирос [токандырҙы].* Х. Зарипов.

♦ **Банк сөйөү** *кар.* **банк** 2. **Бүрек сөйөү** *кар.* **бүрек. Морон сөйөү** *шул ук* **танау сөйөү** (*кар.* **танау**).

**СӨЙӨҮ** [2] *к. кар.* **сөйөрөү** [1].

**СӨЙӨШӨҮ** *к. урт. кар.* **сөйөү** [1] 1—3.

**СӨЙРӨЛӨҮ** *к. кар.* **өйрөлөү** 1.

**СӨЙҺҮРҒЫС** *и. диал.* Кыпсыуыр.

**СӨЙӘЛ** *и.* **1.** Тәнгә сыға торған каты түңәрәк үҫенде. *Сөйәл сығыу.* ■ *Ябай сөйәл махсус вирустарҙың тәнгә әләгеүе менән барлыкка килә.* В. Ғүмәров.

2. Кул-аяктағы тиренең өйкәлеүҙән каты булып кабарған урыны. *[Нәфисә — Рауилға:] Бына хәҙер кулыңда сөйәл бар инде. Тик һин ул сөйәлде йомшарта күрмә, йәме!* С. Агиш.

**СӨЙӘЛЛЕ** *с.* **1.** Сөйәл (1 мәғ.) үҫкән, сөйәле булған. [Морҙаштың] *кара сөйәлле кәгез танауы ороло бәрәңгегә окшап [тора].* Д. Юлтый.

2. Сөйәл (2 мәғ.) сыккан, сөйәле булған. *Сөйәлле аяк. Сөйәлле кул.*

**СӨЙӘЛЛӘНЕҮ** *к.* Сөйәллегә (2 мәғ.) әйләнеү; сөйәлләү. *Кемдер бераү .. кәйлә йөкмәгән, .. кулдары сөйәлләнеп, умырылып ярылган, Мөлөк ағайға карай килә.* Т. Хәйбуллин. *Сөйәлләнгән кулдары, батыр хеҙмәт улдары, һәр көн таш ярып.* Б. Вәлит.

**СӨЙӘЛЛӘҮ** *к. кар.* **сөйәлләнеү.**

**СӨКӨЛДӘҮ** *к. кар.* **сөкөрләү.** — *Нимә уның менән сабый балалар кеүек сөкөлдәргә! — тине Фәриҙә.* Р. Низамов.

**СӨКӨЛДӘШЕҮ** *к. кар.* **сөкөрләшеү.** *[Мөхит — Булатка:] Әйҙә, Гөләйшә инәй һине әллә касан эҙләтә. .. [Ә һин] бында рәхәтләнеп, икәү-*

*ләп кенә, сөкөлдәшеп ултыраһың.* К. Кинйәбулатова.

**СӨКӨРЛӘҮ** *к.* Яғымлы, йомшаҡ итеп һөйләшеү, сөкөр-сөкөр килеү.

**СӨКӨРЛӘШЕҮ** *к.* Үҙ-ара сөкөр-сөкөр килеп, әкрен, генә һөйләшеү, кәңәшләшеү. *Ҡарт менән ҡарсыҡ тәмләп, сөкөрләшеп кенә сәй эсеп ултыра ине.* Ғ. Байбурин. *Әхмәҙулла бабай ҡарсығы Фәхризиян әбей менән сөкөрләшеп, донъя көтә.* Р. Низамов. *[Миңһылыу:] Арғы остоң Хәйрулла, Мөхәмәт ағайҙарығыҙ, беҙгә алыҫ булһалар ҙа, ғүмер буйы шулар менән бергә сөкөрләшеп йәшәнек.* К. Кинйәбулатова.

**СӨКӨР-СӨКӨР** *окш.* Татыу ғына, әкрен генә һөйләшкән тауышты белдергән һүҙ. *Сөкөр-сөкөр килеү. Сөкөр-сөкөр һөйләшеү.*

**СӨКӨРТ** *и. диал.* Соҡор-саҡыр яһап яткан көрт. *Сөкөртлө юл.* ■ *Ишбулдының күҙ алдына Ҡандыруба соҡорондағы яр һымаҡ сөкөрттәр .. килеп баҫты.* И. Ғиззәтуллин.

**СӨКҮНӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тынлыҡ, тыныслыҡ. *Ысынлап та был ваҡытта бөтә ер йөҙөн бик тәрән сөкүнәт ҡаплаған.* М. Ғафури. *Бәғзе тау араларында .. көндөҙ шылт иткән тауыш та булмай, .. сөкүнәт хөкөм һөрә.* Ғ. Рафиҡи.

□ **Сөкүнәт итеү** (*йәки* **ҡылыу**) тын ҡалыу. *Йыртҡыс хайуандар ҡул сабалар, башҡалары сөкүнәт итәләр.* М. Ғафури.

**СӨКҮТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Өнһөҙ хәл, торош. *Инде үткән йәш ғүмерҙе үйламауҙан йәм табам, бик күп эштәрҙә сөкүт менән ҡалыуҙан йәм табам.* М. Ғафури. *Хуп күргәс, йәриәнең йыр йырлауын, шариғтың сөкүтенән жәуаз мөфад.* Аҡмулла.

**СӨКӘЛ** *и. диал.* Сөмбәй. *Сөкәлдә һыу инеү.*

**СӨКӘЛТ** *р.* Киҫкен рәүештә, ҡапыл. *Йылғаны сыккас та юл икегә айырылды. Нурйән көнбайышка, сөкәлт һулға боролған .. юлға төштө.* С. Кулибай.

**СӨКӘНЛӘҮ** *к. диал.* Бөкрәнләү. *Муллағәли бабайҙың, .. нисә килһәң дә, аласығында һөйләнә-һөйләнә сөкәнләп йөрөгән көнө.* Р. Солтангәрәев.

**СӨКӘТӘ** *и. диал.* Этеш.

**СӨЛГӘ** *и. диал.* Һөлгө.

**СӨЛДӨРСӨМӘК** *и.* Бармаҡтарҙы һанап әйтемләгәндә, сығанаҡ бармаҡҡа тура килгән һүҙ.

**СӨЛҮК** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡылыҡ. *Милләттәштәр, иттифаҡҡа беҙ килмәйек, хәбел әл-мәтин сөлүгенә беҙ теҙелмәйек.* С. Яҡшығолов.

**СӨЛӘЙМӘН** [*ғәр.*] *и.* **1.** *кар.* **һәләймән**[1]. **2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

♦ **Сөләймән мөһөрө** томбойоҡтар ғаиләһенә ҡараған йыуан тамырлы, аҡ йәки алһыу сәскәле, ҡыҙыл йәки ҡара емешле, аҡһырғаҡҡа оҡшаш һыу үҫемлеге.

**СӨМ**[1] *с.* Тирәсе бейек, төбө тәрән булған. *Сөм һауыт.*

**СӨМ**[2] *киҫ.* Сифаттың мәғәнәһен көсәйтә. *Сөм йәшел. Сөм күк.* ■ *Егет сөм ҡара күҙҙәре менән матур итеп йылмайҙы.* К. Ибәтуллин. *Күҙҙәрең сөм ҡара, хас күмер, бер ҡарауы үҙе бер ғүмер.* Н. Нәжми. *Тупраҡ сөм ҡара бында.* М. Кәрим.

**СӨМБӨЛ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк. кит.* Иген башағы. **2.** Ләлә һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған хуш еҫле, ойошҡан ваҡ ҡыңғырау сәскәле, ҡыяҡ япраҡлы гөл. *Иркәләп шат йәштәрҙең күңелдәрен аңҡыны хуш еҫтәре сөмбөлдәрҙең.* С. Ҡудаш.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**СӨМБӘЙ** *и.* Йылға, күлдә төбө соҡорланып ятҡан тәрән урын; сөмбәйел. *Сөмбәйҙә һыу инеү. // Сөмбәй ер.* ■ *Томбойоҡ араһындағы .. сөмбәйҙә әле лә, моғайын, ҡарыш аялыҡ бәрҙеләр леберләшеп яталыр.* Н. Мусин. *Һыу инергә был йылғаның ярҙары уңай икән, иң тәрән тигән сөмбәйе муйындан ғына икән.* С. Кулибай.

**СӨМБӘЙЕЛ** *и. кар.* **сөмбәй.** *Ә инде әҙәм күмерҙәй сөмбәйелдең береһен сыкканда тәртә төбөң өҙөлдөмө, донъялағы оло газап башлана:* Н. Мусин.

**СӨМБӘЛӘ** *и.* **1.** (*баш хәреф менән*) *астр. иҫк.* Зодиактың береһе (Әсәд менән Мизан йондоҙлоҡтары араһында урынлашҡан).

**2.** Ҡояш календары буйынса алтынсы айҙың ғәрәпсә исеме (22 август — 21 сентябрь ваҡытына тура килә).

**СӨМГӨЛ** *с.* Төбө соҡорланып ятҡан тәрән һыулы. *Сөмгөл урын. // Сөмгөлдә һыу инеү.* ■ *[Илмырҙа] йырлар булған ҡарап туғайҙарға, шаулы йылға, сөмгөл күлдәргә* М. Тажи.

**СӨМГӨЛЛӘНЕҮ** *к.* Сөмгөлгә әйләнеү, сөмгөл булыу. *Сөмгөлләнеп китеү.*

**СӨМКӘ** *с. диал.* **1.** Сөмгөл. *Сөмкә күл.* **2.** *кар.* **сөм**[1]. *Сөмкә һауыт.*

**СӨМӨКӘЙ** *и. диал.* Сөмбәй. *Сөмөкәйгә төшөү. // Сөмөкәй ер.* ■ *[Емеш:] Төпһөҙ сөмөкәй урындар [бар] бит бында.* З. Биишева.

**СӨМӨРТ**: **сөмөрт ҡара** сөм ҡара. *Зөләйхаының .. сөмөрт ҡара күҙҙәре генә үҙгәрмәгән, әүәлгесә.* Н. Мусин. *Сәстәрем минең сөмөрт ҡара. Һиңә бигерәк иртә сал төшкән.* Р. Бикбаев.

**СӨНБӘЛӘ** [*ғәр.*] *и. кар.* **сөмбәлә.** *Ҡарыш ауылына килеп еттем сөнбәлә йондоҙоноң өсөндә.* «Батыршаның хаты».

**СӨНДӨС** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Атлас, йоҡа ебәк туҡыма. *Урыны ине фирҙәүестең түр башы, сөндөс, истәбрактан ине хөлләһе.* Ш. Бабич.

**СӨНКИ** [*фарс.*] *терк.* Эйәртеүле ҡушма һөйләмдә баш һөйләм менән эйәрсен һөйләм араһындағы сәбәп мөнәсәбәтен белдерә. *Боҙҙан һыуыҡ, көмөштән саф был шишмәгә ҡая битләп һығыла-бөгөлә һуҡмаҡ һуҙылған. «Ҡыҙҙар һуҡмағы» тип йөрөткәндәр уны, сөнки ҡыҙҙар ошо һуҡмаҡтан бер өҙлөкһөҙ шишмәгә йөрөп торған* З. Биишева. *Значокка күҙем төшкән һайын бик ашҡына минең йөрәгем, сөнки ул бит миңә сиңыфымдың атап биргән бөйөк бүләге.* Х. Ҡунаҡбай.

**СӨННИ** [*ғәр.*] *и.* Сөннәт (3 мәғ.) мәҙһәбендәге кеше. *Сөнниҙәр йүнәлеше.*

**СӨННӘТ** [*ғәр.*] *и. дини* **1.** Йола, ғәҙәт. *Йәрҙе һөймәк, ғишыҡ тотмаҡ — әнбиәләр сөннәте* (Халыҡ йырынан).

**2.** Мосолмандарҙағы ир баланы бабаға биреү йолаһы. *Сөннәткә биреү. Сөннәткә ултыртыу.* ■ *Ҡарсыҡ әйтә: — Беҙ Мөхәммәт өммәте, ти, тейеш булырға баланың сөннәте, ти.* Т. Арслан.

**3.** Мөхәммәт пәйғәмбәр хәдистәрен ҡөрьән менән тиң һанаған мосолман мәҙһәбе.

♦ **Сөннәт бүлмәһе** мәсеттең сисенеп инә торған алғы бүлмәһе. *Мәүлет бай .. мәсеттең сөннәт бүлмәһенең ишеген бикле тапты.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Пәйғәмбәрҙең сөннәте өс.* Әйтем.

**СӨННӘТЛЕ** *с.* Бабаға бирелгән, сөннәткә (2 мәғ.) ултыртылған. *Сөннәтле бала.*

**СӨННӘТЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **сөннәтләү.** *Баланы сөннәтләтеү.*

**СӨННӘТЛӘҮ** *ҡ.* Сөннәткә (2 мәғ.) ултыртыу, сөннәтле итеү. *Ислам дине сөннәтләүҙе үҙенсә файҙаланған: уныңса, ошо йоланы үтәгән кеше генә үҙен мосолман тип иҫәпләй алған.* В. Ғүмәров.

**СӨННӘТСЕ** *и.* Сөннәткә (2 мәғ.) ултыртыусы; баба.

**СӨНӘҒӘТ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Оҫта, оҫта ҡуллы. *Сөнәғәт кеше.*

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**СӨНӘЙ: сөнәйгә** (*йәки* **сөнәй баҙарына**) **китеү** йоҡоға талыу. *Баш йомшаҡҡа тейһә, нимә булғанын үҙегеҙ беләһегеҙ — сөнәй баҙарына киткән дә барғанмын шул.* З. Хисмәтуллин.

**СӨНӘШ** *с. диал.* Һыҡмыр.

**СӨҢГӨЛ** *с. диал.* **1.** Сөмгөл. *Йылғаның сөңгөл урыны.* ■ *Бер мал һине сөңгөл ялмап алды, ҡолас ташлап һыуҙа йөҙгәндә.* Р. Ғарипов.

**2.** *диал. ҡар.* **сөм** [1]. *Сөңгөл һауыт.*

**СӨҢКӨЛДӘК** *с.* Сөңкөлдәп, күп һөйләнгән. *Сөңкөлдәк бисә.*

**СӨҢКӨЛДӘТЕҮ** *ҡ.* Ризаһыҙлыҡ белдереп һөйләнергә юл ҡуйыу.

**СӨҢКӨЛДӘҮ** *ҡ.* Ризаһыҙлыҡ белдереп һөйләнеү. *[Усман:] Ҡуйсы, сөңкөлдәмә әле, бисәкәй.* Н. Иҙелбай. *Ҡолош мулланың көн дә сөңкөлдәп маҙаһыҙлауынан [Хөббөнисаның] башы айнығаи.* Т. Хәйбуллин.

**СӨҢКӨЛДӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **сөңкөлдәү.**

**СӨҢКӘ** [1] *с. диал.* Сөмгөл. *Сөңкә ятыулыҡ.*

**СӨҢКӘ** [2] *и. диал.* Сынаяҡ өҫтө (*ҡар.* **сынаяҡ**).

**СӨҢКӘЙЕҮ** *ҡ. һөйл.* Билдәле бер яҡҡа ауышыу. *Алға сөңкәйеү.*

**СӨҢКӘЙТЕҮ** *ҡ. һөйл.* Билдәле бер яҡҡа ауыштырыу. *Шәлде маңлайға сөңкәйтеп ябыныу.*

**СӨПӨКӘ** *с. мыҫҡ. диал.* Төпөш. *Сөпөкә буйлы.*

**СӨПӨЛДӘТЕҮ** *ҡ.* Сөп-сөп иттереү, сөп-сөп килтереү. *Сөпөлдәтеп үбеү. Сөпөлдәтеп ялау.*

**СӨПӨЛДӘҮ** *ҡ.* Сөп-сөп итеү, сөп-сөп килеү.

**СӨПРӘ** *и. диал.* Сүпрә. *Ҡамырға сөпрә һалыу.*

**СӨПСӨНӨҮ** *ҡ.* Әҙ-мәҙ әләктергеләп ҡапҡылау. *Быйыл бесәндең таҙа, яҡшы булып уңыуы, арыштан да аҙ-маҙ сөпсөнөү сәбәпле, көрән ат һимергән.* Ғ. Дәүләтшин.

**СӨП-СӨП** *окш.* Һурғанда, ялағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Сөп-сөп итеү. Сөп-сөп килеү.*

**СӨР** [1] *и.* Сәкән тубы. *Минең сәкәнем дә, сөрөм дә, .. ашыҡ бәкәлсәйҙәрем дә [буртлек мөйөшөндә] ине.* С. Кулибай.

**СӨР** [2], **сөр-р** *окш.* Ваҡ йәнлектең, коштоң йәки һыҙғыртҡыстың һ. б. ҡалтырап сыҡҡан нәҙек тауышын белдергән һүҙ. *Сөр итеү. Һыҙғыртҡысты сөр-р итеп һыҙғыртыу.*

**СӨР** [3] *ымл.* Сүрәкә уйынында тын алмай йүгергәндә әйтелгән һүҙ. *Сөр-р итеп йүгереү.*

**СӨР** [4] *и.*, **сөр ҡурай** *ҡар.* **сор** [2].

**СӨРКӨЛДӘҮ** *ҡ.* **1.** Сөрк-сөрк итеү, сөрк-сөрк килеү. *Ҡулдә сурәгәй өйрөк ултыра сөркөлдәп.*

**2.** *диал.* Сөкөрләү. *Оҫтабикә .. сәй янында көндәге кеүек сөркөлдәп һөйләшмәне.* А. Карнай.

**СӨРКӨЛДӘШЕҮ** *ҡ.* **1.** *урт. ҡар.* **сөркөлдәү** 1. *Сурәгәй өйрәктәр сөркөлдәшә.*

**2.** *ҡар.* **сөкөрләшеү.** *Уфтана йомшаҡ күңелле әбей. Раил йөрөүенән туҡтармы, ике йәш йөрәк сөркөлдәшеп кенә тороҙҙармы тип көтә ул.* А. Ғирфанов. *Беҙ еңгәгеҙ менән шулай сөркөлдәшеп йәшәйбеҙ.* Т. Арслан.

**СӨРКӨҮ** *и.* Ҡорт ҡарағанда төтәтеү өсөн хеҙмәт иткән суҡмар башлы, тотҡалы уҫаҡ сөрөгө.

**СӨРК-СӨРК** *окш.* Ваҡ коштарҙың тамағынан ҡалтыранып сыҡҡан өҙөк-өҙөк нәҙек тауышты белдергән һүҙ. *Сөрк-сөрк итеү. Сөрк-сөрк килеү.*

**СӨРКӘМӘ** *и. диал.* Бөгөп һығаи ваҡ бәлеш; бөккән. *Сөркәмә бешереү.*

**СӨРЛӘТЕҮ** *ҡ.* Сөр [2] иттереү, сөр-сөр килтереү. *Һыбыҙғыһын сөрләтеп ҡысҡыртып ебәрҙе.* ■ *Көслө беләк сипаратты көйгә йырлата, ҡуйы һөттән айырып ҡаймаҡтарын, силәктәргә түгә, сөрләтә.* Ғ. Мәсғүт.

**СӨРЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Сөр [2] итеп ҡысҡырыу; сөр-р итеү.

**2.** *кусм.* Һыҙып ҡына сөр-сөр итеү (шыйыҡлыҡҡа ҡарата). *Сөрләп ағыу.*

**СӨРӨК** *и.*, **ағас сөрөгө** Ныҡ серей, ыуалып торған ҡоро ағас киҫәге. *Ағас сөрөгө. Сөрөк онтағы.* ■ *Геологтар сөрөктән төтөнлөк һалып, палата алдында ултыра ине.* Н. Мусин. *Мөһөйә .. сөрөк онтап, Фәрзәнәһен бәйләне, имеҙеп йоҡлатты.* Я. Хамматов.

♦ **Сөрөк киҫәкһе** *ҡар.* **киҫкә.** *[Сурагол — Ҡолморҙаға:] Мин .. һинең дошманың Сурагол. .. Түрәләреңә ни әйтергә уйлайһың, сөрөк киҫкәһе.* Т. Хәйбуллин.

**СӨРӨКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Сөрөккә әйләнеү. *Өйҙөң бурәнәләре сөрөкләнеп бөткән.*

**СӨРӨКЛӘҮ** *ҡ. диал.* Төтәҫләү.

**СӨРӨЛДӘТЕҮ** *ҡ.* Сөр-сөр иттереү, сөр-сөр килтереү. *Сөрөлдәтеп ағыҙыу. Сөрөлдәтеп сиңерткә ҡысҡыра.* ■ *Тәйләков һыҙғыртҡысын сөрөлдәтеп, .. теге өс кешене әрсәләргә тырышып ҡараны.* С. Кулибай.

**СӨРӨЛДӘҮ** *ҡ.* Сөр-сөр килеү, сөр-сөр итеү. *Далала сиңерткәләр сөрөлдәй. Ҡулдә тәлмәрйендәр сөрөлдәй.* ■ *Әйтерһең, минең ярһыуымды аңланы, [крандан] һыу бер тын сөрөлдәп ағып ҡуйҙы.* Ғ. Әмири.

**СӨРӨМ** *и.* Бәләкәй генә суртан балаһы.

**СӨРӨШ** *с. ҡар.* **сырыш.** *Сөрөш бит. Сөрөш тире.* ■ *Йәш сағында мыйығы ҡуйы ла, матур ҙа булғандыр бәлки, ә хәҙер ул сөрөш йөҙөндә, әйтерһең, йәбештереп ҡуйылған — тырпайып тора.* Ш. Янбаев.

**СӨРӨШӨҮ** *к. кар.* **сырышыу.** *Бите сөрөшөп бөткән.* ■ *[Әсәйем] сөрөшөп бөткән тарамыш ҡулын саҡ ҡалҡытып, мине битемдән, башымдан һыйпаны.* Й. Солтанов.

**СӨРӨШТӨРӨҮ** *к. кар.* **сырыштырыу** 1. *Маңлайҙы сөрөштөрөү.* ■ *Стенала ҡыҙыл рам эсендә .. Ленин бабай ултыра. Ул күҙҙәрен сөрөштөрөбөрәк йылмайған да туп-тура миңә ҡарай.* Й. Солтанов.

**СӨР-СӨР** *окш.* Ҡабат-ҡабат сөр[2] иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сөр-сөр итеү. Сөр-сөр килеү.*

**СӨРСӨТ** *и. диал. кар.* **өйөр** 3.

**СӨРҮР** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Шатлыҡ, ҡыуаныс. *Уйлаймын ғүмеремдә күрмәм тип шатлыҡ, сөрүр.* С. Яҡшығолов. *Ул мәҡанда шул кәҙәр булды сөрүр, ул сөрүрға бәлки лайыҡтыр ғорур.* М. Өмөтбаев.

**СӨРХӘНТӘЙ** *и.* Йолҡош кеше; хөрәсән. // *Сөрхәнтәй кеше.*

**СӨРӘГӘЙ** *и. диал.* Сүрәгәй өйрәк (*кар.* **өйрәк** 1).

**СӨРӘЙӘ** [*гәр.*] (*баш хәреф менән*) *и. иҫк. кит. астр.* Өлкәр.

**СӨРӘКӘ(Й)** *и. кар.* **сүрәкә.** *Сөрәкә һуғыу.*

**СӨСКӨЛ** *с.* Әсе булмаған, әсеп етмәгән. *Сөскөл икмәк. Сөскөл йыуа. Сөскөл ҡатыҡ.*

**СӨСКӨЛТ** *с. кар.* **сөскөл.** *Өҙөп-өҙөп иҫкән һалҡынса ел .. һуңлап сәскә атҡан валерьяндың сөскөлт еҫен алып килде.* Ш. Янбаев.

**СӨСКӨЛТӨМ** *с. кар.* **сөскөл.**

**СӨСКӨРӨК** *и.* **1.** Сөскөргәндәге хәрәкәт һәм тауыш.

**2.** Сөскөртә торған ауырыу. *Сөскөрөк тейеү.*

**СӨСКӨРӨНӨҮ** *к. кайт. кар.* **сөскөрөү.**

**СӨСКӨРӨҮ** *к.* **1.** Ауыҙ-морондан ирекһеҙ рәүештә ҡапыл ныҡ итеп тын бөркөү. *Сәғиҙә [көлкөһө килгәнен Сафаға] һиҙҙермәҫ өсөн кулъяулығы менән ауыҙын ҡаплап, ситкә боролдо ла сөскөргән кеше булды.* М. Тажи. *Сысҡан батша ҡыҙының танау тишегенә ҡойроғон тыҡҡан, .. батша ҡыҙы сөскөрөп ебәргән* (Әкиәттән).

**2.** Көйгә килеп, эшләп китә алмағанда киҫкен рәүештә өҙөк-өҙөк тауыштар сығарыу (моторға, механизмға һ. б. ҡарата). *Мотор .. бер нисә тапҡыр сөскөрөп алғас, эшләй башланы.* Ә. Вәли.

**СӨСКӨРӨШӨҮ** *к. һөйл. урт. кар.* **сөскөрөү.**

**СӨСКӨРТӨҮ** *к.* **1.** Сөскөрөргә (1 мәғ.) мәжбүр итеү. *Борос сөскөртә.*

**2.** *эйһ. ф. кар.* **сөскөрөү** (1 мәғ.). *Нишләптер сөскөртә лә сөскөртә.*

**СӨСӨ**[1] *с.* **1.** Тоҙо һәм башҡа ҡырҡыу тәме юҡ йәки етерлек булмаған; *киреһе* әсе. *Сөсө аш. Сөсө йыуа. Сөсө ҡул. Сөсө булыу.*

**2.** Әсеткә һалмай яһалған. *Сөсө ҡамыр. Сөсө күмәс. Сөсө ҡоймаҡ.* ■ *Булған икмәк тә сыуал төбөндә йәки усаҡта бешкән сөсө, ҡаты көлсә генә була ине.* Ғ. Ишбулатов. *Кәбир Гөлзифа инәйҙә .. сөсө икмәк менән баллап-майлап сәй эсте.* Я. Вәлиев.

**3.** Ныҡ әсемәгән, ҡырҡыуланмаған. *Сөсө бал. Сөсө ҡатыҡ. Сөсө ҡымыҙ.*

**4.** *күсм.* Үтә ныҡ яғымлы, яһалма нескә хисле; йыуа. *Сөсө кеше.* / Үтә ныҡ яғымлылыҡты, яһалма нескә хисте сағылдырған. *Сөсө һүҙ. Сөсө тел.* ■ *Сәләх Солтанович, бер ни ҙә булмаған һымаҡ, сөсө генә йылмайҙы.* Ш. Насыров. *Бейҙең өҫтө бәҫле тип, .. сөсө телле һөйләй тип, уйламай атҡа менмәгеҙ* (Ҡобайырҙан).

**СӨСӨ**[2] *и. диал. кар.* **силсә** 1. *Хан да булған бейҙәрҙең теләнең осо сөсө булыр* (Ҡобайырҙан).

**СӨСӨК** *и.* Ҡайындың туҙы аҫтындағы йомшаҡ ҡатлам; күшкә.

**СӨСӨКӘЙ** *с. һөйл.* Сөсө[1] (4 мәғ.) телле. *Сөсөкәй ҡатын.* ■ *[Фатима:] Йә, йә, ҡыҙым! Кемгә оҡшап ошолай сөсөкәй булғанһыңдыр инде.* Р. Ғабдрахманов.

**СӨСӨЛДӘҮ** *к. кар.* **сүселдәү** 1.

**СӨСӨЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Сөсөгә (1 мәғ.) әйләнеү; сөсө булыу.

**2.** *күсм.* Үтә яғымлы булып, нескә хисле булып ҡыланыу; сөсө телләнеү. *Башҡа ваҡыт булһа, Таһир был илаҡ ҡыҙ менән сөсөләнеп маташмаған булыр ине.* К. Мәргән.

**СӨСӨЛӘШЕҮ** *к.* Яғымлы һүҙҙәр менән иркәләшеү. *[Нурия:] Донъя булғас, төрлө сағы була инде уның. Әселәшеп тә, сөсөләшеп тә китәһең.* Н. Мусин.

**СӨСӨРӨҮ** *к. диал.* Сөсөү.

**СӨСӨТӨҮ** *к.* Сөсөгә[1] (3 мәғ.) әйләндереү, сөсө итеү. *[Кинйәбикә] улдарына самауыр ҡайнатып бирә алманы, аласыҡҡа инеп, ҡатыҡ сөсөтөп эсергә ҡушты.* Ж. Кейекбаев.

**СӨСӨҮ** *к.* Сөсөгә[1] (3 мәғ.) әйләнеү, сөсө булыу. *Ҡаймаҡты күберәк һалһаң, ҡатыҡ сөсөй.*

♦ **Йөрәк** (*йәки* **күңел**) **сөсөү** эсе теләү, эсеһерәү. *Сәйҙе шәкәрләп эсһәм, йөрәк сөсөй.*

**СӨТ** *ҡыу. диал.* Себә.

**СӨТУИ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Бағана (газеталағы). *Газета сөтүндәре һинең исемең менән тулды.* М. Ғафури.

**СӨХБӘТ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Аралашҡан, дуҫлашҡан хәл. *Әҙәмдә һауа китмәҫ ғәрип булмай, фөкара сөхбәтенә кәриб булмай.* Аҡмулла.

□ **Сөхбәт итеү** аралашыу, ҡатнашыу. *Байҙың ҡыҙы ғүзәлдер, .. ләкин [хәҙрәттең] нәфсеһе быны менән генә кәнәғәт ҡылмаҫ, бер кәррә аҡ йөҙлө, күгелйем күҙле бер ғүзәл менән дә сөхбәт итеүҙе теләр.* З. Һаҙыев.

**СӨХБӘТЛӘШЕҮ** *к. иҫк.* Аралашып дуҫлашыу; ҡатнашыу. *Сөхбәтләшеп йәшәү.*

**СӨХӘНДАН** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Яҙыусы, әҙип.

**2.** Телмәр оҫтаһы.

**СӨҺӨР** [*гәр.*] *и. иҫк.* Ҡунаҡтан ҡалған аш (дин әһелдәрен саҡырып сығарғас, уларҙан ҡалған ашты бүлешеп ашар булғандар).

**СПА́ЗМА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡыҙыл үңәс, эсәк, ашҡаҙан, тамаҡ һ. б мускулдарының тартышып ҡыҫҡарыуы, тығыҙланыуы. *Бронхылар спазмаһы. Ҡыҙыл үңәс спазмаһы. Мускулдар спазмаһы. Эсәктәр спазмаһы.*

**СПАРТАКИА́ДА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Традицион рәүештә үткәрелгән комплекслы күмәк спорт ярышы. *Йәйге спартакиада. Бөтә Союз спартакиадаһы.* ■ *Ейәнсәре Ғәйшә лә район үҙәгенә*

*әҙерләнде. Ул унда уҡыусылар спартакиадаһында ҡатнашасаҡ.* Р. Низамов.

**СПАРТАН** [*рус.* спартанец] *и.* **1.** Боронғо Спарта дәүләтенең үтә ҡаты тормош шарттарында йәшәргә күнеккән, сыҙамлылығы, сабырлығы менән айырылып торған гражданы. *Спартан ҡатын (ҡыҙ).*

**2.** Үҙен ҡаты тормош шарттарына, төрлө мохтажлыҡтарға ҡуйып сыныҡтырған кешегә ҡарата әйтелә. *Спартан тормошо. Спартан булып йәшәү.*

**СПАС** [*рус.*] *и.* Йәй аҙағында үткәрелә торған өс сиркәү һәм көнкүреш байрамының исеме (беренсе спас йәки бал спасы; икенсе спас йәки алма спасы; өсөнсө спас). *Ерҙең беренсе спаста һөрөлөп, яҡшы сәскес менән сәселеүе, тупрағының урта бармаҡтай булыуы .. арҡаһында арыш емерелеп үҫте.* Ғ. Дәүләтшин. *Спас кәрәгә лә бары ун-ун биш көн генә ҡалып бара.* Ф. Иҫәнғолов.

**СПЕКТАКЛЬ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Театр тамашаһы. *Спектакль афишаһы. Спектакль ҡарау. Спектаклдә ҡатнашыу.* ■ *Башҡорт театрының тәүге спектаклдәре 1920 йылда Стәрлетамаҡта [ҡуйылы]. М. Мәһәҙиев. Спектакль башланды. Фатима сәхнәлә уйналған ташҡын тойғолар диңгеҙенә тиҙ генә сумып китә алманы.* Б. Бикбай.

**СПЕКТР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Яҡтылыҡ нуры призма йәки башҡа һынығ һыҙыҡтар аша үткәндә барлыҡҡа килгән төрлө төҫтәгә буй-буй һыҙат. *Спектрҙың төп төҫтәре. Оптик спектр. Яҡтылыҡ спектры.* / *махс.* Бик ныҡ ҡыҙған есемдә йәки матдәне махсус оптик прибор аша үткәргәндә алынған, был есемдәрҙең химик составын һәм физик хәлен сағылдырған төҫлө һыҙаттар. *Ай спектры. Водород спектры. Натрий спектры.*

♦ **Магнит спектры** *физ.* магнит сағылдырған һыҙыҡтарҙың арауыҡтағы бүленеше.

**СПЕКТРАЛЬ** [*рус.* спектральный] *с.* Спектрҙарҙы сағылдырған, күрһәткән. *Спектраль һыҙыҡтар. Спектраль анализ.* / Спектрҙағы төрлө-төрлө төҫтө ҡабул итеүгә мөнәсәбәтле. *Күҙҙең спектраль һиҙгерлеге.* / Ниндәйҙер нурланышты спектрға һалыу өсөн хеҙмәт иткән. *Спектраль приборҙар.*

♦ **Спектраль анализ** спектрҙарын тикшереү нигеҙендә матдәнең составын һан һәм сифат яғынан билдәләй торған физик ысул. *Спектраль анализ ярҙамында газдарҙың химик составын белергә мөмкин.*

**СПЕКТРОГРАММА** [*рус.*] *и.* Спектрҙың фото һүрәте. *Айҙың спектрограммаһы. Урандың спектрограммаһы.*

**СПЕКТРОГРАФ** [*рус.* ⟨ *лат.* + *гр.*] *и.* Есемдәрҙең спектрын, күк объекттарының һ. б. физик үҙенсәлектәрен тикшергәндә нурланыш спектрын төшөрөп алыу һәм теркәү өсөн ҡулланылған оптик прибор.

**СПЕКТРОГРАФИК** *с.* Спектрограф ярҙамында алып барылған. *Йондоҙҙарҙы спектрографик тикшереү.*

**СПЕКТРОМЕТР** [*рус.* ⟨ *лат.* + *гр.*] *и.* Есемдәрҙең спектрын төшөрөп алыу һәм спектраль характеристикаһын үлсәү өсөн ҡулланылған оптик прибор. *Оптик спектрометр.*

**СПЕКТРОМЕТРИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.* + *гр.*] *и.* Спектрҙарҙы үлсәү теорияһын һәм ысулдарын эшләгән фән.

**СПЕКТРОСКОП** [*рус.* ⟨ *лат.* + *гр.*] *и.* Спектрҙы күҙәтә торған оптик прибор.

**СПЕКТРОСКОПИК** *с.* Спектроскоп ярҙамында башҡарылған; спектроскопияға таянған. *Спектроскопик лаборатория. Спектроскопик тикшеренеүҙәр.* ■ *Таш өлгөләре микроскоп аҫтында ҡарала, уларға химик, спектоскопик, люминесцентлы һәм башҡа төрлө анализдар яһала.* Д. Бураҡаев.

**СПЕКТРОСКОПИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.* + *гр.*] *и.* Физиканың электромагнит нурланыш спектрҙарын өйрәнгән бүлеге.

**СПЕКУЛЯНТ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Спекуляция менән шөғөлләнгән кеше; алыпһатар. *Баҙар спекулянты.* ■ *Спекулянттар уҙармандан сабышып, игенде арзан хаҡҡа алалар ҙа, шунда уҡ .. әллә ни тиклем файҙа менән һатып ебәрәләр.* Ғ. Дәүләтшин. *Спекулянттар аҙыҡ хаҡын көндән-көн ҡыйбатлаталар. Тормош туҙә алмаҫлыҡ ауырайҙы.* Х. Мохтар.

**СПЕКУЛЯНТЛЫҠ** *и.* Спекуляция эше. *Спекулянтлыҡ менән шөғөлләнеү.*

**СПЕКУЛЯТИВ** [*рус.* спекулятивный] *с.* Спекуляцияға мөнәсәбәтле. *Спекулятив сауҙа. Спекулятив хаҡ.*

**СПЕКУЛЯЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Тауар һатып алып, файҙа ҡалдырыу маҡсатында ҡиммәтерәк хаҡҡа һатыу шөғөлө; спекулянтлыҡ эше. *Спекуляция өсөн судҡа тарттырыу.* ■ *Ғайнанов итәк аҫтынан араҡы һата, спекуляция менән шөғөлләнә.* А. Карнай.

**СПЕЛЕОЛОГ** [*рус.*] *и.* Спелеология өлкәһендә эшләгән белгес. *Халыҡ-ара спелеологтар конгресы. Халыҡ-ара спелеологтар союзы.* ■ [*Әбделхаҡ:*] *Әхмәт, һин был тирәләге мәмерйәләргә Сөмбөлдө алып барырға вәғәҙә иткәнһең түгел ме? Ул әсәһе шикелле, спелеолог булам, тип хыяллана.* Ш. Янбаев.

**СПЕЛЕОЛОГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Мәмерйәләрҙең барлыҡҡа килеүен, хәҙерге торошон һәм нисек файҙаланылыуын тикшереү менән шөғөлләнгән фән.

**СПЕРМА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. физиол.* Ата енес биҙҙәре эшләп сығарған енес күҙәнәкле шыйыҡса мәней.

**СПЕРМАТОЗОИД** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ата енес күҙәнәге; орлоҡ. *Өлгөргән сперматозоид. Үҫемлек сперматозоиды. Хайуан сперматозоиды.*

**СПЕЦИАЛИСТ** [*рус.*] *и. ҡар.* **белгес.**

**СПЕЦИАЛЛӘШЕҮ** *к. ҡар.* **махсуслашыу** *Специаллашкән хужалыҡ.*

**СПЕЦИАЛЛӘШТЕРЕҮ** *к. ҡар.* **махсуслаштырыу.** *Хужалыҡты специаллаштереү.*

**СПЕЦИАЛЬНОСТЬ** [*рус.*] *и. ҡар.* **һөнәр** 1 *Специальность алыу.*

**СПЕЦИФИК** *с. ҡар.* **үҙенсәлекле.** *Специфик еҫ.*

**СПЕЦИФИКА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. ҡар.* **үҙенсәлек** *Сәнғәт спецификаһы. Хеҙмәт спецификаһы.*

**СПЕЦОВКА** [*рус.*] *и.* Махсус эш кейеме (куртка, халат, комбинезон һ. б.). *Ирҙәр спецовкаһы. Ҡатын-ҡыҙ спецовкаһы. Спецовка кейеү*

**СПИДВЕЙ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и. спорт.* Стадиондың ҡырсын йәки боҙ, ситҙәм һ. б. юлында тиҙлеккә үткәрелгән мотоцикл ярышы. *Спидвей буйынса ил беренселеге.*

**СПИДОМЕТР** [*рус.* ⟨*ингл.* + *гр.*] *и.* Автомобилдең, мотоциклдың йөрөш тиҙлеген күрһәткән прибор. *Атнаҡаев спидометрға ҡараны: — Дүртенсе тиҙлек!* К. Мәргән.

**СПИННИНГ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Сыбыҡ осондағы дүңгәләк аша бер осо кәтүкле сығырға уралған, икенсе осона ялтырмаҡлы ҡармаҡ ҡуйылған еп үткәрелгән балыҡ тотоу ҡоралы. *Спиннингты ырғытыу. Спиннингты тартыу.*

**СПИРАЛЬ** [1] [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Ясылыҡта ятҡан нөктә йәки күсәр тирәләй тоташмай әйләнгән кәкре һыҙыҡ. *Спираль һыҙыу.* / Шул рәүештәге йүнәлеш. *Спираль буйлап барыу.*

**2.** Шул һыҙыҡ рәүешендәге махсус тимерсыбыҡ йәки сым. *Үтек спирале. Плитка спирале.*

**СПИРАЛЬ** [2] [*рус.* спиральный] *с.* Ясылыҡта ятҡан нөктә йәки күсәр тирәләй тоташмай әйләнгән кәкре һыҙыҡ рәүешендәге. *Спираль пружина. Спираль һыҙыҡ.*

**СПИРИТИЗМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Үлгән кешенең рухы менән аралашыу мөмкинлегенә ышанған мистик ағым. / Үлгән кеше менән бәйләнешкә инеү өсөн башҡарылған төрлө ырым (өҫтәл күсереү, сынаяҡ тәгәрәтеү һ. б.).

**СПИРИТУАЛИЗМ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Рухты ысынбарлыҡтың төп нигеҙе, материянан тыш һәм ирекле йәшәгән айырым бер есемһеҙ субстанция итеп таныған объектив-идеалистик философик ҡараш.

**СПИРИТУАЛИСТ** [*рус.*] *и.* Спиритуализм яҡлы кеше.

**СПИРОМЕТР** [*рус.*] *и.* Һулап сығарған һауа күләменә ҡарап, үпкәнең һыйҙырышын үлсәй торған прибор.

**СПИРОМЕТРИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.* + *гр.*] *и.* Спирометр ярҙамында үпкәнең булған һыйҙырышын үлсәү ысулы.

**СПИРТ** [*рус.*] *и.* **1.** Крахмаллы, шәкәрле нәмәләрҙе ҡыуыу юлы менән алынған алкоголгә бай шыйыҡлыҡ. *Спирт еҫе. Спирт заводы. Спирт менән ыуыу. Крахмалдан спирт етештерелә.* **Спирт термометры** спирт менән эшләгән термометр.

**2.** *хим.* Водород атомы һыу ҡалдығы менән алмаштырылған органик берләшмә, углеводородтың береһе. *Ағас спирты. Этил спирты.*

♦ **Нишатыр спирты** *ҡар.* **нишатыр.**

**СПИРТЛАУ** *к.* **1.** Спирт менән ҡатнаштырыу. *Дарыу үләндәренең һутын спиртлау.*

**2.** Спиртҡа маныу. *Мамыҡты спиртлау.*

**СПИРТЛЫ** *с.* Спирт ҡушылған, спирт менән эҙерләнгән; спирт ҡатнаш. *Спиртлы буяҡ. Спиртлы эсемлек.*

**СПИРТОВКА** [*рус.*] *и.* Яғыулыҡ итеп спирт ҡулланған ҙур булмаған йылытыу йәки яҡтыртыу приборы; спирт шәме.

**СПЛАВ** [1] [*рус.*] *и. ҡар.* **ҡыуғын** [2].

**СПЛАВ** [2] [*рус.*] *и. ҡар.* **иретмә** 1.

**СПОРТ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Тәнде нығытыу, сыныҡтырыу маҡсатында үткәрелгән физик күнекмәләр (гимнастика, көрәш, туризм, төрлө уйындар һ. б.). *Ат сабышы спорты. Парашют спорты. Парус спорты. Саңғы спорты. Һыу спорты. Спорт костюмы. Спорт инвентары. Спорт уйындары.* / Шундай физик күнекмәләрҙең төрлө төрө буйынса ярыштарҙы һәм уҡытыу-күнекмә шөғөлдәрен ойоштороу һәм үткәреү системаһы. *Совет спортын үҫтереү. Спортта уңышҡа өлгәшеү.*

**СПОРТСМЕН** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Спорт менән системалы рәүештә һәм профессия булараҡ шөғөлләнгән кеше; спортсы. *Спортсмендар ярышы.*

**СПОРТСЫ** *и. ҡар.* **спортсмен.**

**СПРАВКА** [*рус.*] *и.* **1.** Кем йәки нимәлер тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт биргән документ. *Ауыл советы справкаһы. Врач справкаһы. Справка алыу. Справка биреү. Справка яҙыу.*

**2.** *ҡар.* **белешмә** 1.

**СПРАВОЧНИК** [*рус.*] *и. ҡар.* **белешмә** 2.

**СПРИНТ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Ҡыҫҡа араға йүгереү, йөҙөү һ. б.

**СПРИНТЕР** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Спринт буйынса спортсмен.

**СПРИНЦОВКА** [*рус.*] *и.* Һыу, дарыу һиптереп, яра йәки бүтән нәмә эсен йыуҙыра торған ҡулайлама.

**СПРУТ** [*рус.*] *и. ҡар.* **һигеҙаяҡ.**

**СПУТНИК** [*рус.*] *и.* Ер йәки башҡа күк есеме тирәләп хәрәкәт иткән космос осоу аппараты. *Ер спутниғы.* ■ *Спутниктың бортына космос киңлеген тикшереүҙәрҙе дауам итеү өсөн тәғәйенләнгән фәнни аппаратуралар урынлаштырылған.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 22 декабрь.

**СРЕДА** [*рус.*] *и. ҡар.* **мөхит.**

**СРЕДСТВО** [*рус.*] *и.* **1.** *ҡар.* **сара** 1. *Транспорт средстволары.* ■ *Башҡорт АССР-ының экономик системаһы нигеҙен дәүләт (дөйөм халыҡ) һәм колхоз-кооператив милке формаһында етештереү средстволарына социалистик милек тәшкил итә.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**2.** Аҡса, капитал, материаль байлыҡ. *Йәшәү средствоһы. Материаль средство. Төп һәм әйләнеш средстволары.*

**3.** *күсм. ҡар.* **мөмкинлек** 2.

**СРОК** [*рус.*] *и.* **1.** Ғәҙәттә берәй нәмә өсөн билдәләнгән, тәғәйенләнгән ваҡыт араһы. *Армияла хеҙмәт итеү срогы. Биш йыл срокка билдәләнгән аренда. Һынау срогы.* ■ *[Айбулат — Асатайға:] Йөҙ илле саҡырым. Дүрт көн срок. Көнө-төнө сап.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Нимәнелер башҡарыу йәки нимәнеңдер булыу моменты. *Китеү срогы тәғәйенләү. Ссуданы түләү срогы. Экзамен биреүҙең һуңғы срогы.*

**СРОКЛЫ** *с.* Билдәле срокка иҫәпләнгән, билдәле срок дауам итә торған. *Ҡыҫҡа сроклы кредит. Сроклы ссуда.* ■ *[Нестеров] рота командиры исеменә ҡыҫҡа сроклы отпуск һорап, ғариза бирҙе.* Б. Дим.

**СРОКҺЫҘ** *с.* Берәй срок менән сикләнмәгән. *Срокһыҙ паспорт.*

**ССУДА** [*рус.*] *и.* Билдәле тәртиптә кире ҡайтарыу шарты менән аҡса йәки башҡа нәмәнең бурысҡа биреләүе, шулай уҡ бурысҡа алынған

шул аҡса йәки нәмә. *Аҡса ссудаһы. Дәүләт ссудаһы. Ҡыҫҡа сроклы ссуда. Ссуда ведомосы. Ссуда проценты. Ссуда алыу. Ссуда биреү.*

**СТАБИЛИЗАТОР** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Хәрәкәт иткән есемгә тотороҡлоҡ биргән прибор йәки ҡулайлама. *Автомобиль стабилизаторы. Бомба стабилизаторы. Самолёт стабилизаторы.*

**2.** Ниндәйҙер дәүмәлдең даимилығын, тотороҡлолоғон тәьмин иткән ҡулайлама. *Көсөргәнеш стабилизаторы. Тирбәлеш стабилизаторы. Ток стабилизаторы.*

**3.** Ниндәйҙер матдә үҙенсәлегенең үҙгәрешен тотҡарлаған икенсе бер матдә. *Пластмасса стабилизаторы. Шартлатҡыс стабилизаторы.*

**СТАБИЛЛЕК** *и.* Даими, тотороҡло хәл; стабиль хәл, күренеш. *Стабиллек күрһәткесе.*

**СТАБИЛЛӘШЕҮ** *к.* Даими, тотороҡло хәлгә килеү; стабиль булыу. *Фронттағы хәл стабилләште. Хисап эше стабилләште.*

**СТАБИЛЛӘШТЕРЕҮ** *к.* Даими, тотороҡло хәлгә килтереү; стабиль итеү. *Валютаны стабилләштереү. Фронт һыҙығын стабилләштереү. Хаҡты стабилләштереү.*

**СТАБИЛЬ** [*рус.* стабильный] *с.* Даими, тотороҡло. *Стабиль план. Стабиль хаҡ.*

◆ **Стабиль дәреслек** уҡыу йортонда ниндәйҙер фән буйынса өйрәнелергә тейешле ҡулланма сифатында раҫланып, артыҡ үҙгәртелмәй бер нисә йыл ҡабат баҫылып килгән дәреслек.

**СТАВКА** [*рус.*] *и.* **1.** Ғәскәр башлығы йәки уның штабы урынлашҡан ер. *Ставкаға барыу.*

**2.** Бөтә ғәскәрҙең юғары хәрби баш идараһы. *Юғарғы главнокомандование ставкаһы.* ■ *Пугачёв ставкаһы тарафынан бик күп прокламация яҙыл[а].* «Әҙәби Башҡортостан», 1960, № 8.

**3.** Эш хаҡы размеры; оклад. *Тариф ставкаһы. Һалым ставкаһы. Ярты ставкаға эшләү.*

**СТАДИАЛЛЕК** *и.* Нимәнеңдер стадиялы булыуы. *Үҫеш стадиаллеге.*

**СТАДИОН** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Спорт буйынса күнегеүҙәр һәм уйындар үткәреү өсөн футбол майҙаны, башҡа майҙансыҡтары, йүгереү өсөн юлдары булған, тамашасылар өсөн трибуна менән уратып алынған ҡоролма. *Түбәле стадион. Мәктәп стадионы.* ■ *Ғәбделхаҡ атаһы менән килеп ингәндә стадиондың күп яруслы трибуналарында тығыҙланып урынлашҡан халыҡ диңгеҙе ҡорт иләүе кеүек ҡайнаша ине.* Д. Исламов.

**СТАДИЯ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Нимәнеңдер үҫешендә үҙенең айырым сифат үҙенсәлеге булған бер баҫҡыс; этап. фаза. *Башланғыс стадия. Һуңғы стадия. Бойҙайҙың яровойлашыу стадияһы. Ҡарышлауыҡ үҫешенең ҡурсаҡ стадияһы.*

**СТАДИЯЛЫ** *с.* Стадиянан стадияға күсә барған. *Стадиялы процесс. Стадиялы үҙгәреш. Стадиялы үҫеш.*

**СТАЖ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Берәй эш һәм эшмәкәрлек дауам иткән ваҡыт араһы. *Ғилми эш стажы. Дөйөм эш стажы. Өҙлөкһөҙ стаж. Уҡытыусылыҡ стажы. Хеҙмәт стажы.* / Ижтимағи ойошма сафында торғанда дауам иткән ваҡыт араһы. *Комсомол стажы. Партия стажы. Профсоюз стажы.*

**2.** Эш башлаған кешенең тәжрибә алып, һөнәргә эйә булыуы өсөн кәрәк булған ваҡыт. *Стаж алыу. Һынау стажын үтеү.*

**СТАЖЁР** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Ҡайҙалыр стажировка үтеп йөрөгән кеше.

**СТАЖИРОВКА** [*рус.*] *и.* **1.** Махсус уҡыу йортон бөтөргәндән һуң, учреждение һ. б. штатына алыныр алдынан кешенең эштә һынау ваҡытын үтеүе. *Стажировка срогы. Стажировка үтеү.*

**2.** Ниндәйҙер һөнәргә эйә булыу өсөн уҡыусының алған эш күнекмәһе, хеҙмәт тәжрибәһе. *Йәйге стажировка. Мәктәп стажировкаһы.* ■ *Әле булган стажировка системаһы ижади фекерләүҙе үҫтереүгә ҙур йогонто яһай алмай — ул производство менән таныштырыу кимәлендә генә уткәрелә.* «Совет Башҡортостаны», 1986 28 июнь.

**СТАЖЛЫ** *с.* Күпмелер стажға эйә, ҙур стажы бар. *Стажлы уҡытыусы.* ■ *Сәлим ағай утыҙ биш йыллыҡ стажлы юғары квалификациялы хәреф йыйыусы.* Х. Мохтар.

**СТАЙЕР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Алыҫ араға йүгереүсе йәки йөҙөүсе, коньки шыуыусы һ. б. спортсмен. *Шамсун биш километр араға йүгереү буйынса республиканың иң көслө стайеры булып танылға[н].* Н. Мусин.

**СТАКАН** [*рус.*] *и.* **1.** Ҡулға тотоп, эсә торған тотҡаһыҙ, сөм быяла һауыт. *Ҡырлы стакан. Бәләкәй стакан. Стакан менән эсеү.* ■ *Ғәбитов .. графиндан стаканға һыу ҡойоп эсте.* Я. Хамматов. *Сәғиҙә .. өҫтәлдәге тулы һыулы стаканды иҙәнгә ауҙарып төшөрҙө.* М. Тажи. / Шул һауытҡа һыйған нәмә. *Гөлйөҙөм .. бер стакан һалҡын һыуҙы йотлоғоп эсеп бөттө.* Һ. Дәүләтшина. *Мулла Хәлимов, тирләшеп, стакан артынан стакан һыу эсә.* Д. Юлтый.

**2.** Эсе ҡыуыш цилиндр рәүешендәге төплө деталь.

**СТАКАНЛАП** *р.* Стакан менән. *Стаканлап үлсәү. Стаканлап һатыу.* ■ *Бер ҡыҙ мөйөштәге болдорҙа .. стаканлап көнбағыш һатып ултыра.* С. Агиш.

**СТАЛАГМИТ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Кальций һәм углекислый газ менән туйынған һыу тамсыларының түбәнән, көмбәҙҙән ағып төшөүе арҡаһында мәмерйә төбөндә ослайып йәки бағана булып ҡатҡан (күберәк эзбизлы) минераль ултырма. *Сталагмит бағанаһы.* ■ *Аҡкын мәмерйәһенең «иҙәне» боҙ менән ҡапланған. .. Иҙәндән һерәйеп ҡалҡып торған сталагмиттар ҙа боҙҙан тора.* М. Хисмәтов.

**СТАЛАГМИТЛЫ** *с.* Сталагмиттары булған, сталагмиттар тупланған. *Сталагмитлы мәмерйә.*

**СТАЛАКТИТ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Кальций һәм углекислый газ менән туйынған һыу тамсыларының парға әйләнеүе арҡаһында имсәк йәки саҡтар рәүешендә ҡатып, аҫылынып торған (күберәк эзбизлы) минераль ултырма. — *Быны беҙ мәмерйәнән бәләкәс кенә сталактиттар ҙа алып сыҡтыҡ,— тип балаларҙың береһе нәҙек быяла торбаға оҡшап торған таштар күрһәтте.* Ғ. Ибраһимов.

**СТАЛАКТИТЛЫ** *с.* Сталактиттары булған, сталактиттар тупланған. *Сталактитлы мәмерйә.*

**СТАЛЕВА́Р** [*рус.*] *и. кар.* **короссо.**

**СТАН** [1] [*рус.*] *и.* **1.** Баҫыу, балыҡсылыҡ һ. б. бригадаларының сезонлы эш осоронда ваҡытлыса торған урыны, торағы. *Баҫыу станы. Бригада станы.* ■ *Барлыҡ трактористар, .. прицепщиктар, сәсеүселәр — бөтәһе лә иртән иртүк станга йыйылды.* Ә. Вәли.

**2.** *тар.* Революцияға тиклемге Россияла өйәҙҙең административ яҡтан һәм полиция участкалары яғынан бүленеше. *[Желудовский] бөтә губернала маҡтаулы .. станында тагы ла крәҫтиән балалары башланган икән тигән атаҡ сыгыуҙан бигерәк тә ныҡ ҡурҡа ине.* һ. Дәүләтшина.

**СТАН** [2] [*рус.*] *и.* **1.** Терәк, таяу хеҙмәтен үтәгән ҡоролма. *Тирмән станы. Утын бысыу станы.*

**2.** Металды баҫым, ҡыҫым менән эшкәрткән машина йәки машиналар системаһы. *Прокат станы. Сым һуҙыу станы.* ■ *Был цехта мин үҙем эшләнем. Ҡайнар .. корос киҫәктәрен ҙур ҡыпсыуыр менән эләктереп алып, стандарга ташлап йөрөнөм.* М. Хәйҙәров.

◆ **Киндер станы** *кар.* **киндер.**

**СТАНАУАЙ** [*рус.* становой] *и. һөйл.* Стан [1] (2 мәғ.) башлығы.

**СТАНДА́РТ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* **1.** Нимәнеңдер дәүмәле, рәүеше һәм сифаты буйынса тап килеүен талап иткән өлгө. *Аҙыҡ-түлек стандарты. Агас материалдары стандарты. Донъя стандарты кимәле. Стандартҡа килтереү.* // *Стандарт деталдәр. Стандарт йорттар. Стандарт мебель.*

**2.** Бер ниндәй үҙенсәлеге, оригиналлеге менән айырылып тормаған нәмә; шаблон, трафарет. // *Стандарт темалар. Стандарт һорау. Стандарт һүҙҙәр.* ■ *Ҡайһы берҙә [шигырҙа] лирик «мин»гә тәбиги булмаган сифаттар бирелә, йә иһә тартып-һуҙып дөйөм бер стандартҡа буйһондорола.* М. Ғәли.

**СТАНДАРТЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Талап ителгән дәүмәл, рәүеш, сифатҡа килтереү. *Деталдәрҙе стандартлаштырыу. Продукцияны стандартлаштырыу. Шрифтарҙы стандартлаштырыу.*

**2.** Индивидуаль үҙенсәлекте бөтөрөү, бер ҡалыпҡа һалыу. *Стандартлаштырып һүрәтләү.*

**СТАНДАРТЛАШЫУ** *ҡ.* **1.** Талап ителгән дәүмәл, рәүеш, сифатҡа килеү; стандартҡа һалыныу. *Стандартлашкан продукция.*

**2.** Индивидуаль үҙенсәлек бөтөрөлөү, бер ҡалыпҡа һалыныу. *Стандартлашкан алым. Стандартлашкан образ.*

**СТАНО́К** [*рус.*] *и.* **1.** Төрлө нәмә яһай һәм эшкәртә торған машина. *Ҡырыу станогы. Тишеү станогы. Типография станогы. Токарь станогы. Туҡыу станогы. Фрезер станогы.* ■ *Станок бер тигеҙ тауыш сыгарып, зырлап әйләнә.* Б. Бикбай.

**2.** Берәй төрлө эш өсөн булған йайланма, ҡоролма. *Алтын йыуыу станогы. Дуга бөгөү станогы.* ■ *Балсыҡ әҙер булгас та станокҡа ҡуялар, унда уны калыплап, сынаяҡ итеп ҡоялар.* Ғ. Амантай.

**3.** *хәрби* Орудие, пулемёт ныгытып ҡуйылған нигеҙ. *Пулемёт станогы.*

**4.** *а. х.* Дағалау, дауалау һ. б. өсөн малды индереп ҡуя торған йайланма. *Дагалау станогы. Дауалау станогы.*

**5.** Һарай эсендә яңғыҙ мал өсөн эшләнгән бәләкәй бүлмә. *Сускалар таҙартылып, станоҡтарга бикләнгән.* Ә. Зәйнуллин. *Хәҙер Буян юҡ инде. .. Айгырҙың станогы буш.* Р. Низамов.

**СТАНОКЛЫ** *с. хәрби* Станокка (3 мәғ.) ныгытылған. *Станоклы пулемёт.*

**СТАНОКСЫ** *и.* Станокта (1 мәғ.) эшләгән кеше. *Металл эшкәртеүсе станоксы.*

**СТАНСА** *и. һөйл.* Станция.

**СТА́НЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Билдәле маршрут менән йөрөгән поезд һәм бүтән транспорт сараһы туҡтай торған урын. *Автобус станцияһы. Метро станцияһы. Тимер юл станцияһы. Станция дежурныйы. Станция начальнигы.* ■ *Ишбулат агай Төйләгән станцияһына поезга ултырыу башланыр алдынан гына килеп етте.* З. Биишева. *Ярһып ҡысҡырҙы ла паровоз, станцияга килеп туҡтаны.* Х. Ҡунаҡбай.

**2.** Билдәле бер территорияны берәй йәһәттән хеҙмәтләндергән йәки тикшеренеү эше алып барған махсус учреждение. *Метеорологик станция. Сейсмик станция. Мелиорация станцияһы. Ремонт станцияһы. Санитария һәм эпидемиология станцияһы. Телефон станцияһы. Тәжрибә станцияһы.* ■ *Улар [һәүәҫкәр радистар] йүнле нәмә тыңламай, әле бер, әле икенсе станцияны тотоп, юҡ-бар әҙләп тик ултыра.* Р. Солтангәрәев. *Инкубатор станцияһынан бер машина себеш алып ҡайттылар.* Р. Ғабдрахманов.

◆ **Автоматик планета-ара станция** космос бушлығын, Айҙы, планеталарҙы тикшереү өсөн ғилми аппаратура менән йыһазландырылған пилотһыҙ осоу аппараты. **Орбиталь станция** Ер, Ай йәки башҡа планеталар тирәләп орбитала оҙаҡ ваҡыт эшләгән, пилот менән йәки пилотһыҙ йөрөгән космос осоу аппараты.

**СТА́ПЕЛЬ** [*рус.* ⟨*гол.*] *и.* Караптарҙы төҙөү, йүнәтеү, һыуға төшөрөү өсөн хеҙмәт иткән, һыуға ауыш бетонланған майҙан. *Арҡыры стапель. Стапелгә мендереү. Стапелдән төшөрөү.*

**СТАРАТЕЛЛЕК** *и.* Старатель эше. *Старателлек итеү.*

**СТАРА́ТЕЛЬ** [*рус.*] *и.* Ябай ысул менән үҙ йайына алтын эҙләп, алтын йыуған кеше. *Кәшфи менән Бастан .. Ирәндек буйын айкап, ваҡ-ваҡ шишмәлектәр буйында алтын йыуган старателдәр ине.* С. Кулибай. *Алтын приискыһына яҡыраҡ килеп, гел хазина һәм байыгыу хаҡында гына хыялланган .. старателдәр күп түгел ине.* Я. Хамматов.

**СТА́РОСТА** [*рус.*] *и.* **1.** Артель, йәмәғәт эшен алып барыу өсөн һайлап йәки билдәләп ҡуйылған вазифалы кеше. *Ауыл старостаһы. Артель старостаһы. Сиркәү старостаһы.* ■ *Малбай староста халыҡ алдында үҙенең булдыҡлылыгын күрһәтер өсөн .. күпер һалдырмаҡ була.* Б. Бикбай. *Күкрәгенә миҙал таҡкан староста күренде* (Бәйеттән).

**2.** Класта, түңәрәктә һ. б. ерҙә тәртип һаҡлау өсөн уҡыусылар араһынан һайлап ҡуйылған кеше. *Класс старостаһы. Курс старостаһы.*

**СТАРТ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* **1.** Уҙыш ярыштарының башланған мәле. *Саңгысылар старт ала. Старт биреү.* ■ *Иң һуңынан 800 метрга старт бирелде.* Ә. Бикчәнтәев. / Осоу аппара-

тының күтәрелгән мәле. *Самолётты стартҡа әҙерләү.*

**2.** Берәй араны үтеү буйынса ярыш башланған урын. *Эстафетала ҡатнашыусыларҙың стартҡа баҫыуы.* / Осоу аппараты күтәрелеп китә торған урын. *Самолётты стартҡа ҡуйыу. Старттан күтәрелеп китеү.*

**СТАРТЁР** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* **1.** Стартҡа (1 мәғ.) сигнал биргән кеше. *Стартёр сигналы.*

**2.** Эске яныу двигателен тоҡандыра торған ҡорамал. *Өс ҡыҙыл ракета күккә күтәрелде.— Алға! — тип команда бирҙе Новиков. Зубенко аяғы менән стартёрға баҫты.* Ғ. Аллаяров.

**СТАРШИНА** [*рус.*] *и.* **1.** Совет Армияһында иң юғарғы кесе командир дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше (хәҙерге прапорщик). *Рота старшинаһы. Старшина погоны. Старшина булыу.*

**2.** Совет хәрби диңгеҙ флотында сержантҡа тиң кесе командир дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше. *Беренсе дәрәжәле старшина. Икенсе дәрәжәле старшина.*

**3.** Революцияға тиклемге Россияла ниндәйҙер ҡатлам йәки һөнәр кешеләренең ойошмаһына етәкселек итеү өсөн һайлап ҡуйылған кеше. *Присяжный заседателдәр старшинаһы. Цех старшинаһы.*

♦ **Ғәскәр старшинаһы** революцияға тиклемге Россияла ҡаҙаҡ ғәскәрендәге подполковникка тиң офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше. **Волость старшинаһы** 1861 йылғы реформанан һуң төҙөлгән дөйөм крәҫтиән идаралығындағы вазифалы кеше. *Эткол бай — борон-борондан ауылдың аҡһаҡалы. Күп ваҡыт буйы уҙ йортоноң, волосының старшинаһы булып килгән.* Ғ. Дәүләтшин. *Волость старшинаһын һайларға бер йыл ҡалды тигәс тә, Ныязгол үҙенең бөтә политикаһын, оҫталығын юлға һалып, байлығын йәлләмәй һигеҙ ауыл .. һайлаусыларын уҙ яғына ауҙарырға тырышты.* Һ. Дәүләтшина. **Поход старшинаһы** *тар.* башҡорттарҙа сик һыҙығын һаҡлаған команда башлығы.

**СТАРШИНАЛЫҠ** *и.* Старшина вазифаһы. *Старшиналыҡ итеү.* ■ *Пугачёв етәксел згендәге крәҫтиән һуғышы башланғанға тиклем Кинйә Арсланов Башҡортостандың Нуғай юлы Бошмаҫ Ҡыпсаҡ волосында старшиналыҡ хеҙмәтен үтәүсе кеше булған.* Ә. Усманов.

**СТАТИК** *с.* **1.** Хәрәкәтһеҙ, тыныс хәлгә мөнәсәбәтле. *Йылғаның статик кимәле. Статик баҫым. Статик теория.*

**2.** Хәрәкәтһеҙ, үҙгәрешһеҙ. *Мускулдарҙың статик көсөргәнеше. Статик хәл. Статик рәүештә һүрәтләү.* ■ *Яҙма поэзия традицион образдарҙы бер ваҡытта ла статик рәүештә ҡулланмай, традицион образға элек һалған эстетик йөкмәтке яңы сифаттар менән байытыла.* В. Әхмәҙиев.

**СТАТИКА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* **1.** Механиканың көс тәьҫире аҫтындағы есемдең тигеҙлек һаҡлау шартын өйрәнә торған бүлеге. *Ҡоролмалар статикаһы. Механизмдар статикаһы.*

**2.** Есемдәрҙең хәрәкәтһеҙ торған хәле. *Ҡаты есем статикаһы.*

**СТАТИСТ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Һүҙһеҙ ролдә уйнаған, күмәк күренештәрҙә ҡатнашҡан артист.

**СТАТИСТИК** [*рус.*] *и.* Статистика буйынса белгес, статистика менән шөғөлләнгән кеше. *Статистик вазифаһы. Статистик булып эшләү.*

**СТАТИСТИК** *с.* Статистикаға мөнәсәбәтле. *Статистик бюро.* / Статистикаға нигеҙләнгән. *Статистик контроль. Статистик күҙәтеүҙәр. Статистик мәғлүмәт. Статистик таблица.*

**СТАТИСТИКА** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* **1.** Йәмғиәт менән ижтимағи хеҙмәт үҫешенең һан күрһәткестәрен һәм шул күрһәткестәрҙең үҙгәрешен, үҙ-ара нисбәтен сифат йөкмәткеһе менән тығыҙ бәйләнештә өйрәнә торған фән.

**2.** Халыҡ хужалығының, ижтимағи тормоштоң ниндәйҙер өлкәһендә шул фән ысулдары менән алып барылған иҫәп һәм шул иҫәп биргән мәғлүмәт. *Статистика идаралығы. Ауыл хужалығы статистикаһы. Демография статистикаһы. Промышленность статистикаһы. Тимер юл статистикаһы. Төҙөлөш статистикаһы. Тыуыу статистикаһы.*

**3.** Ҡайһы бер фәндә ҡулланылған һан күрһәткестәре ярҙамында тикшереү ысулы.

♦ **Математик статистика** математиканың ғилми һәм практик һығымталар яһау өсөн нимәнеңдер һан күрһәткестәрен, һандар биргән мәғлүмәттәрҙе системалаштырыу һәм файҙаланыу ысулдарын ҡулланған бүлеге.

**СТАТОР** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Электр машиналарының хәрәкәтһеҙ өлөшө. *Генератор статоры. Турбина статоры.*

**СТАТУС** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Халыҡ-ара хоҡуҡта: билдәле бер хәл. *Дипломатик статус. Дәүләттең бойондороҡһоҙлоҡ статусы.*

**СТАТУС-КВО** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Халыҡ-ара хоҡуҡта: билдәле бер ваҡытта булған хәл. *Статус-квоны һаҡлау. Статус-квоны яңынан ҡайтарыу.* ■ *Донъя үтә йылдам үҙгәреш процестары кисерә һәм шундай хәлдә бер кемдең дә унда статус-квоны мәңгелеккә һаҡлап ҡалыу мөмкинлеге юҡ.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.

**СТАТУТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Нимәнелер башҡарыу, ҡулланыу, эшләү тәртибен билдәләгән ҡағиҙәләр йыйылмаһы. *Дан ордены статуты.* // Ойошманың ойоштороу принциптарын, эшмәкәрлек тәртибен билдәләгән устав, ҡағиҙә. *БМО статуты. Ҡала статуты. Университет статуты.*

**СТАТУЭТКА** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Бүлмәне матурлар өсөн эшләп ҡуйылған бәләкәй генә скульптура. *Бронза статуэтка. Фарфор статуэтка.*

**СТАТУЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Кеше йәки хайуандың ғәҙәттә бөтә һынын кәүҙәләндергән скульптура һүрәте. *Мәрмәр статуя. Статуя эшләү. Статуя ҡуйыу.*

**СТАТЬЯ** [*рус.*] *и.* **1.** *кар.* **мәҡәлә.**

**2.** Юридик документтағы, төрлө атамалы яҙмаларҙағы, һүҙлек һәм башҡа нәмәләге айырым бер бүлек. *Договор статьяһы. Енәйәт кодексы статьяһы. Устав статьяһы.*

**3.** Финанс документының, бюджеттың керем сығанағын йәки сығым нигеҙен күрһәткән бүлеге. *Керем статьяһы. Сығым статьяһы. Статья буйынса ҡаралған сығым.*

**СТАФИЛОКОКК** [*рус.* ⟨*гр.*] *и. мед.* Төрлө ауырыу тыуҙырған, ваҡ ҡына йомро бөртөксәләр

рәүешендәге, ишәйгәндә суҡ хасил иткән бактерия төрө. *Стафилококк инфекцияһы.*

**СТАХОНОВСЫ** [*рус.*] *и.* Техниканы ҡулланыуҙа ижади эш итеп социалистик ярышта ҙур уңыштарға ирешкән алдынғы эшсе (Советтар Союзында 1930—1940 йылдарҙа киң таралыш ала). *Стахоновсылар хәрәкәте.*

**СТАЦИОНАР** [*рус.*] *и.* **1.** Күсеп йөрөмәгән, бер урында эшләгән учреждение (больница һ. б.). *Стационарҙа дауаланыу. // Стационар библиотека. Стационар больница. Стационар кинотеатр.*

**2.** *махс.* Ниндәйҙер машина, ҡоролманың ныҡытып ҡуйылған нигеҙе. *Дизелде стационарға ултыртыу. // Стационар киноаппаратура. Стационар двигатель.*

**СТАЧКА** [*рус.*] *и.* Эшселәрҙең эш хужаһына ниндәйҙер талап ҡуйып, ойошҡан рәүештә эш туҡтатыуы; забастовка. *Дөйөм стачка. Политик стачка. Экономик стачка. Стачка көрәше. Стачка хәрәкәте.* ■ *[Ҡотлояр:] Стачкамы? Ул, быны заводта булһын, фабрикта булһын, бик күмәк эшселәрҙең бер төптән һүҙ ҡуйышып алып, бөтәһе бер юлы эш ташлауы була.* Һ. Дәүләтшина.

**СТАЧКАСЫ** *и.* Стачкала ҡатнашҡан кеше; забастовкасы. *Стачкасылар сығышы.*

**СТЕАРИН** [*рус.* ⟨ *фр.* ⟨ *гр.*] *и.* Парафин ҡушып май шәм, яһау, һабын ҡайнатыу, резина эшләү өсөн ҡулланылған аҡ йәки һарғылт төҫтәге май кеүек матдә. *Стеарин кислотаһы. Стеарин етештереү. // Стеарин шәм.*

**СТЕКЛОГРАФ** [*рус.*] *и.* Быялаға йәбештерелгән тексты баҫа торған прибор. *[Ҡулаевтың «Әлепбейе»] тиҙ арала стеклографта баҫылып, бик аҙ һанда ғына таратылды.* **Ф.** Иҫәнғолов.

**СТЕКЛОГРАФИЯ** [*рус.*] *и.* Машинкала баҫылған текстың йәки махсус ҡара менән һыҙылған иллюстрацияның быяла баҫма форманан ҡағыҙға күсерелеүе (хәҙер ротаторҙа, ротапринтта һ. б. баҫыу менән алмаштырыла). *Стеклография ысулы менән баҫыу.*

**СТЕЛЛАЖ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Нимәлер һаҡлау, ҡуйыу өсөн таяуҙарға беркетелгән кәштәләр йәки тирә-яғы ҡапланған шкаф. *Китап стеллажы. Приборҙар стеллажы.* ■ *[Бүлмәлә] оҙон стенаның буйынан — буйына бик ҙур стеллаж ҡуйылған. Унда медицина буйынса ҡалын-ҡалын китаптар, махсус журналдар [теҙелгән].* Д. Бураҡаев.

**СТЕНА** [*рус.*] *и.* **1.** Йорттоң бүлмәләргә бүлеү һәм түшәмде тотоу өсөн хеҙмәт иткән вертикаль өлөшө, эргә яғы. *Аҡ стена. Бурәнә стена. Өй стенаһы. Стена буйы. Стена көҙгөһө.* ■ *Стена сәғәтенең кәкүге хырылдап, өс ҡысҡырҙы.* Б. Бикбай. *Өмөтбайҙың өйө кәкре-бөкрө ҡайын ағасынан .. һупалап ҡына яһалған. [Өйҙөң], оҙаҡ йылдар буйы бөтәйтеү-фәлән күрмәгәнгә, иҫкереп, стеналары ҡыйшайып бөткән.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Баҙ, соҡор кеүек нәмәнең вертикаль ҡабырғаһы. *Окоп стенаһы. Мәмерйә стенаһы.* ■ *Новобранецтарҙың күбеһе блиндаж эсендә стеналарға һөйәлеп ултыралар.* Д. Юлтый.

**3.** Таштан, кирбестән һ. б. эшләнгән бейек ҡойма. *Кремль стенаһы. Крепость стеналары.*

◆ **Стена газетаһы** учреждение, предприятиелағы һ. б. ижтимағи ойошмаларҙың, администрацияның органы булып, ваҡыт-ваҡыт ҡулдан яҙып йәки машинкала баҫып сығарып, элеп ҡуйыла торған газета. *Фәхри бүлмә ишеген асып ингәндә, уның иптәштәре ҙур өҫтәлде уратып, стена газетаһы яҙалар ине.* Б. Ишемғол.

**СТЕНД** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* **1.** Күргәҙмә материал итеп экспонаттар ҡуя торған таҡта. *Күргәҙмә стенды. Стенд эшләү. Стендҡа ҡуйыу.* ■ *Айырым стенд Владимир Ильичтың Өфөлә булыуы тураһында һөйләй.* «Совет Башкортостаны», 1970, 14 февраль.

**2.** Машинаны йыйыу, һынау өсөн махсус ҡоролма. *Стендта машина йыйыу. Һынау стенды.*

**3.** Осоп барған сәпкә дороп менән атырға өйрәнеү йәки спорт күнегеүҙәре үткәреү өсөн махсус йыһазландырылған урын. *Стендта атыу күнегеүҙәре үткәреү.*

**СТЕНОГРАММА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Телмәрҙе стенография менән һүҙмә-һүҙ күсереп алған яҙыу. *Доклад стенограммаһы.*

**СТЕНОГРАФИК** *с.* Стенографияға мөнәсәбәтле. *Стенографик алфавит. Стенографик система. Стенографик тамға.* / Стенография менән яҙылған. *Стенографик отчёт. Стенографик яҙма.*

**СТЕНОГРАФИСТ** [*рус.*] *и.* Стенографик яҙма буйынса белгес.

**СТЕНОГРАФИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Телмәрҙе махсус тамғ һәм ҡыҫҡартмалар менән тиҙ яҙыу ысулы. *Лекцияның стенографияһы.*

**СТЕНОГРАФИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. кар.* **стенографиялау.** *Стенографияланган телмәр.*

**СТЕНОГРАФИЯЛАУ** *ҡ.* Стенография менән яҙыу. *Лекцияны стенографиялау.*

**СТЕНОКАРДИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Күкрәк ситлеге тирәһен ҡыҫып, сәнсеп ауырттыра торған йөрәк ауырыуы. *Стенокардия өйәнәге.* ■ *Стенокардия йышыраҡ атеросклероз менән ауырыған кешеләрҙә була.* В. Ғүмәров.

**СТЕРЕОМЕТРИК** *с.* Стереометрияға мөнәсәбәтле. *Стереометрик мәсьәлә.*

**СТЕРЕОМЕТРИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Элементар геометрияның арауыҡта ятҡан фигураларҙы өйрәнгән бүлеге.

**СТЕРЕОСКОП** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ике ерҙә төшөрөлгән һүрәтте, фотографияны күҙгә күләме бер һүрәт итеп күрһәтә торған оптик прибор.

**СТЕРЕОСКОПИК** *с.* **1.** Күләмле, рельефлы. *Стереоскопик һүрәт.*

**2.** Күләмле, рельефлы һүрәттәр эшләүгә һәм уларҙы күрһәтеүгә мөнәсәбәтле булған. *Стереоскопик кино. Стереоскопик экран.*

**СТЕРЕОТИП** [1] [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Металдан, резинанан йәки пластмассанан ҡойолған баҫма ҡалыбы, типография наборының йәки клишеның күсермәһе (ишәйтеп йәки ҡабаттан баҫыр өсөн ҡулланыла). *Стереотип ҡойоу. Стереотиптан баҫыу.*

**СТЕРЕОТИП** [2] [*рус.* стереотипный] *с.* **1.** Баҫма ҡалыбынан, күсермәнән алынған. *Стереотип баҫма.*

2. *кусм. кит.* Үҙгәрешһеҙ ҡабатланған, ҡалыплашҡан. *Стереотип яуап.*

**СТЕРЕОТИ́ПИЯ** [*рус.*] *и.* 1. *типогр.* Стереотип ҡойоу процесы һәм шунан баҫыу ысулы.

2. *мед.* Ҡайһы бер психик ауырыуҙа күҙәтелгән бер үк хәрәкәтте, һүҙҙе механик рәүештә ҡабатлау күренеше.

**СТЕРЕОТОРБА** [*рус.* стереотруба] *и.* Дошманды, һуғыш ҡырын ышыҡ ерҙән күҙәтер өсөн тәғәйенләнгән окулярлы ике торбанан, өс аяҡтан торған оптик прибор. *Стереоторбанан күҙәтеү.* ■ *Генерал өҫтөндәге буркаһын бер яҡҡа ырғытты ла, стереоторба эргәһенә ултырып, һуғышты күҙәтергә кереште.* Ә. Ихсан.

**СТЕРИЛИЗА́ТОР** [*рус.*] *и.* Стерилизациялау (1 мәғ.) аппараты, приборы. *Шприц стерилизаторы.*

**СТЕРИЛИЗА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* 1. Ҡайнатыу, фильтрлау йәки химик матдәләр менән эшкәртеү аша микробтарҙы үлтереү эше. *Стерилизация үткән аҙыҡ. Стерилизация яһау.*

2. *мед.* Хайуандың йәки кешенең орлоҡ юлын быуып йәки ҡырҡып, енси теләккә зыян итмәй аталандырыу һәләтенән мәхрүм итеү ысулы.

**СТЕРИЛИЗАЦИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **стерилизациялау.** *Стерилизацияланған һөт. Стерилизацияланған инструмент. Стерилизацияланған бинт.*

**СТЕРИЛИЗАЦИЯЛАУ** *ҡ.* 1. Стерилизация (1 мәғ.) яһау. *Космос карабы аппаратураһын стерилизациялау. Консерваны стерилизациялау. Кейемде стерилизациялау.*

2. *мед.* Стерилизация (2 мәғ.) юлы менән ирлек һәләтенән мәхрүм итеү.

**СТЕ́РЛИНГ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] Англияның көмөш һәм алтын аҡса пробаһының законлашҡан стандарты. **Стерлинг фунты** Англияның 100 пенсҡа тиң булған төп аҡса берәмеге.

**СТИЛИЗА́ТОР** [*рус.*] *и.* Ижадында стилизация (1 мәғ.) алымдарын ҡулланған рәссам, яҙыусы.

**СТИЛИЗА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* 1. Сәнғәт әҫәренең ниндәйҙер бер стилгә [1] (1, 2 мәғ.) хас һыҙаттар менән яҙылыуы, шул стилгә буйһондоролоуы. *Яҙыусы .. фольклорҙағы поэтик, стилистик алымдарҙы үҙ ижадына механик рәүештә күсерергә, стилизация юлына баҫырға тейеш түгел.* К. Мәргән. / Әҙәби әҫәрҙең образдарында һәм стиль үҙенсәлектәрендә ниндәйҙер осор колоритының яңыртылыуы. *Фольклор стилизацияһы. Әҙәби әҫәр стилизацияһы.*

2. Ҡайһы бер шартлы алымдар ҡулланыу, һүрәтте йәки форманы ябайлаштырыу аша һүрәтләнгән нәмәнең һәм фигураларҙың дөйөмләштерелеүе. *Туранан-тура стилизация. Боронғо архитектураның стилизацияһы. Декоратив сәнғәт стилизацияһы. Фарфорҙың экзотик өлгөләренең стилизацияһы.*

3. Формаһы менән ниндәйҙер стилгә [1] (1, 2 мәғ.) эйәргән әҫәр.

**СТИЛИСТИК** *с.* Стилде [1] (1, 2 мәғ.) сағылдырған, стилгә ҡараған. *Стилистик алым. Стилистик билдә.* ■ *Образлы телдең стилистик нигеҙе булып, һис шикһеҙ, халыҡ теле һанала.* К. Мәргән. / Һүрәтләү стиленә мөнәсәбәтле. *Поэманың стилистик үҙенсәлеге. Романдың стилистик үҙенсәлеге.*

**СТИЛИ́СТИКА** [*рус.*] *и.* 1. Телмәр стилдәре тураһындағы фән. *Башҡорт теленең стилистикаһы. Классицизм стилистикаһы. Латин стилистикаһы. Романтизм стилистикаһы.*

2. Художестволы әҫәр теленең үҙенсәлеге һәм һүрәтләү саралары. *«Ырғыҙ» романының стилистикаһы. Әҫәрҙең стилистикаһын өйрәнеү.*

3. Тел белеменең телдәрҙәге стилдәр системаһын, аралашҡан төрлө шарттарҙа, яҙманың һәр төрө һәм жанрында әҙәби телдең ҡулланылыу нормаларын һәм юлдарын өйрәнгән тармағы. *Стилистика телде, уның ҡағиҙәләрен, .. экспрессив мөмкинлектәрен, һүрәтләү сараларын билдәле бер маҡсатҡа ярашлы итеп ҡулланырға өйрәтә.* Ғ. Сәйетбатталов.

**СТИЛЛЕ** *с.* Билдәле бер стилдәге [1] (1 мәғ.). *Стилле йорт. Стилле биҙәк. Стилле кейем.*

**СТИЛЛӘШТЕРЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **стилләштереү.**

**СТИЛЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ.* Нимәләр билдәле стилгә [1] (1, 2 мәғ.) хас һыҙаттар биреү, ярашлаштырыу. / Нимәнелер шартлы алымдар менән биреү, һүрәтләү. *Орнаментты стилләштереү.*

**СТИЛЬ** [1] *и.* 1. Идея йөкмәткеһе, художество формаһы яғынан билдәле осор һәм йүнәлеш сәнғәтен йәки сәнғәт оҫталарының индивидуаль алымын асҡан билдәләр йыйымы. *Готика стиле. Ренессанс стиле. Рус опера стиле. Эллин стиле.* ■ *Таллы ауылының түбән осонда .. төрлө ҙурлыҡтағы һәм стилдәге ағас өйҙәр барлыҡҡа килде.* Ә. Вәли. *Иҙәндә — шәреҡ стилендә туҡылған келәм.* Ғ. Хәйри. / Нимәләр хас, нимәнелер айырып торған билдәләр, үҙенсәлектәр йыйымы. *Бюрократик стиль. Канцелярия стиле.*

2. Тел сараларының айырым яҙыусыға йәки әҙәби әҫәргә, йүнәлешкә, жанрға хас ҡулланылыу алымдары. *Индивидуаль стиль. Художестволы стиль. Әҙәби стиль. Реализм стиле. Роман стиле. Романтизм стиле.* ■ *«Үлмәҫбай» поэмаһының поэтик стиле бик тәбиғи ағыштағы ябай әңгәмә стиленә тартым.* Ғ. Хөсәйенов.

3. Әҙәби телдең функциональ төрө. *Ғилми стиль. Ижтимағи-политик стиль. Публицистик стиль. Газета стиле. Һөйләү теле стиле. Эш ҡағыҙҙары стиле.* ■ *Ирекле стиль гәзиттә һөйләү теленә хас.* Ж. Кейекбаев. / Телмәрҙең тел ҡанундарына ярашлы итеп ҡоролошо. *Стиль хатаһы. Ҡульяҙманың стиле төҙөк.*

4. Нимәнелер үҙенсәлекле алымдар менән башҡарыу ысулы. *Етәкселек стиле. «Брасс» стиле менән йөҙөү. Тәрбиә стиле.*

**СТИЛЬ** [2] [*рус.* ⟨ *фр.* ⟨ *гр.*] *и.* Йыл иҫәбен алып барыу ысулы. *Иҫке стиль. Яңы стиль.*

**СТИ́МУЛ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Нимәнелер тормошҡа ашырыуға ынтылыш биргән, эшкә ҡыҙыҡтырған сәбәп; этәргес. *Материаль стимул. Мораль стимул. Эш стимулы. Стимул биреү.* ■ *Яңыны эҙләү, үҙ замандың геройын табыу, уның халыҡ идеалдарын, ынтылыштарын сағылдырған характер үҙенсәлектәрен асыу — реалистик сәнғәтте алға әйҙәүсе төп стимул .. бына шул.* Н. Зарипов.

**СТИМУЛЛАУ** *к.* Нимәгәлер стимул бирсү йәки стимул булып тороу, уның эшләнеүен, тормошҡа ашырылыуын тиҙләтеү; ҡеүәтләү. *Эште материаль яҡтан стимуллау. Эште экономик яҡтан стимуллау. Яҡшы продукция сығарыуҙы стимуллау.* / Төрлө саралар ярҙамында айырым ағзаның йәки организмдың ниндәйҙер системаһының эшмәкәрлеген көсәйтеү. *Матдәләр алмашыныуын стимуллау. Үпкә эшмәкәрлеген стимуллау.*

**СТИМУЛЛАШТЫРЫУ** *к. кар.* **стимуллау.**

**СТИМУЛЯ́ТОР** [*рус.*] *и.* Нимәнеңдер үсешенә, барышына стимул биргән матдә. *Биологик стимулятор. Нервы эшмәкәрлегенең стимуляторы. Үсемлектәрҙең үсеш стимуляторы.*

**СТИПЕНДИА́Т** [*рус.*] *и.* Стипендия алып уҡыған студент йәки уҡыусы. *Ленин стипендиаты.* // *Стипендиат студент.*

**СТИПЕ́НДИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Махсус уҡыу йорттарында, эштән тыш курстарҙа уҡыған кешегә регуляр бирелә торған аҡсалата пособие. *Дәүләт стипендияһы. Завод стипендияһы. Колхоз стипендияһы. Стипендия алыу.* ■ *Бибинур .. педтехникумда уҡый ине, ләкин стипендия аҙ, өйҙән ярҙам юҡ тип, уҡыуын ташлап ҡайтып килде.* Б. Бикбай.

**СТИХИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Боронғо материалистик грек философияһында: тәбиғәттә нәмәнең нигеҙендә ятҡан төп элементтарҙың береһе (ут, һыу, һауа, ер).

**2.** Көслө, емергес тәбиғәт күренеше. *Ут стихияһы. Һыу стихияһы. Стихияға ҡаршы көрәш.* ■ *Башҡорт халҡының эпик репертуарында .. боронғо дәүер кешеһенең стихия көстәренә ҡаршы көрәштә еңеп сығыуын күрһәткән .. ҙур ғына эпик әҫәр барлығы асылды.* К. Мәргән. / Кешенең аҡылға буйһонмаған тойғоһо һәм ҡылығы. *Ул стихия буйынса йөрөй, уның тормошо стихия буйынса ага.* Д. Юлтый.

**3.** Ижтимағи тормоштоң һис бер тәьҫиргә буйһонмаған ҡеүәтле, тәртипһеҙ күренеше; бола. *Башҡортостан тарихы башҡорт халҡының стихия рәүешендә башланган бик күп хәрәкәтен белә.* З. Шәрҡи. / Тәьҫиргә һәм етәкселеккә бирелмәгән ижтимағи мөхит. *Ваҡ-буржуаз стихия. Мещанлыҡ стихияһы.* ■ *[Тукмалган] ике кешенең ҡиәфәтен күреү .. стихия һөрөмөнә иҫергән боласыларҙа кешелек тойғоһо уятҡан кеүек булды.* А. Карнай.

**4.** *күсм.* Күнеккән мөхит, өйрәнгән тормош. *Үҙ стихияһында наҙланып ултыра тере сәскәләр.* З. Биишева.

**СТИХИЯЛЫ** *с.* **1.** Стихия (2 мәғ.) тыуҙырған; ҡеүәтле, емергес тәбиғәт күренешенә хас. *Стихиялы бәлә-ҡаза. Стихиялы көс.* ■ *Көслө ер тетрәүҙәр Дағстанда, Ҡырғыҙстанда булды. Был стихиялы күренештәр беҙҙең илде ҙур мәшәҡәткә дусар итте.* Д. Бураҡаев.

**2.** Кеше, йәмғиәт тәьҫиренән тыш барған, тәбиғи, үҙаллы ғәмәлгә ашҡан күренеш рәүешендәге. *Стихиялы закон. Стихиялы хәрәкәт. Экономик закондарҙың стихиялы характеры. Капиталистик баҙарҙа хаҡтың стихиялы урынлашыуы. Стихиялы рәүештә барған үсеш. Стихиялы рәүештә башланған эш. Экономик закондарҙың стихиялы характеры.* / Бер кем ойоштормаған, етәксеһеҙ барған, барлыҡҡа килгән. *Крәҫтиән восстаниеларының стихиялы характеры.* // *Стихиялы барған көрәш.* ■ *Халыҡ стихиялы ҡуҙғалып китһә, улар араһына инеп, улар араһында ҡотҡо йөрөтөргә, юлдар күрһәтергә беҙҙең ҡулдан килер ине.* Д. Юлтый.

**СТИХИЯЛЫЛЫҠ** *и.* Стихиялы нәмәләргә хас сифат. *Капитализмдың экономик закондарының стихиялылығы. Тәбиғәт көстәренең стихиялылығы.*

**СТО́ИК** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Стоицизм философияһы яҡлы кеше. *Стоиктар философияһы.*

**СТОИЦИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Антик философияла этиканы аҡлы рәүештә донъяла өҫтөнлөк иткән ихтыяжға буйһондороу нигеҙендә төҙөү бурысын ҡуйған, кешенең үҙ теләгенән, нәпсеһенән өҫтөн булыуын талап иткән йүнәлеш.

**СТО́ЙКА** [*рус.*] *и.* **1.** *хәрби, спорт* Кәүҙәне хәрәкәтһеҙ итеп, ҡулдарҙы ике яҡлап тәнгә ҡыҫып, турайтҡан аяҡтарҙы бергә килтереп тупса-тура баҫып торған хәл. *Хәрби стойка.* / *спорт.* Спортсмендың көрәште, уйында һ. б. башлар өсөн баҫҡан хәле. *Боксёр стойкаһы. Көрәшсе стойкаһы.*

**2.** Ҡулдарға таянып йәки башты терәп, аяҡтарҙы юғары күтәреп, баш түбән торған хәл. *Гимнастик стойка. Стойка яһау.*

**СТО́ЙЛА** [*рус.* стойло] *и.* Бер ат йәки һыйыр өсөн һарай эсендә кәртәләп эшләнгән урын. *Өсөнсө көндө төш ваҡытында [бабай] аттар янына килде .. һуҙһеҙ генә стойлалар араһынан йөрөп сыҡты.* Ә. Вахитов.

**СТОЛБНЯ́К** [*рус.*] *и.* Тупраҡтағы үҙенә бер төрлө микробтың йәрәхәт аша тәнгә үтеүенән килә торған йоғошло ауырыу.

**СТОЛО́ВОЙ** [*рус.* столовая] *и. кар.* **ашхана.**

**СТОЛЯ́Р** [*рус.*] *и.* Ағастан төрлө йыһаз эшләү оҫтаһы. *Мебель яһаусы столяр. Столяр изделиеһы. Столяр ҡоралы.* ■ *Иртә менән дүрт сәғәт уҡыу, төштән һуң столяр мастерскойында эш: ултырғыс, өҫтәл, төрлө әкәмәттәр яһайҙар шунда.* Б. Бикбай.

**СТОЛЯРЛЫҠ** *и.* Столяр һөнәре, шөғөлө. *Столярлыҡҡа уҡыу. Столярлыҡ һәләте.*

**СТОМАТО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Стоматология буйынса белгес.

**СТОМАТОЛОГИК** *с.* Стоматологияға мөнәсәбәтле. *Стоматологик клиника. Стоматологик операция.*

**СТОМАТОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Медицинаның урт, яңаҡ, бит, теш ауырыуҙарын өйрәнгән бүлеге. *Стоматология кабинеты. Стоматология клиникаһы.*

**СТОПА́** [*рус.*] *и. эҙ.* Шиғырҙағы күпмелер ижек һаны менән килгән ритмик берәмек.

**СТОП-КРА́Н** [*рус.*] *и.* Тимер юл вагондарында поезды кәрәк саҡта тиҙ генә туҡтатыу өсөн ҡуйылған тормоз краны. *Поезды стоп-кран менән туҡтатыу.*

**СТОП-СИГНА́Л** [*рус.*] *и.* Автомобилдә, троллейбуста һ. б. арттан килгән транспорттың шофёрын тормоз һалырға иҫкәрткән утлы сигнал приборы. *Егеттәр шофёр менән хушлашып, уны*

*стоп-сигналдың кыҙыл уты .. күҙҙән юғалғансы оҙатып калды.* Ф. Лоҡманов.

**СТО́РОЖ** [*рус.*] *и. ҡар.* **ҡарауылсы.**

**СТРА́ЖНИК** [*рус.*] *и. тар.* Революцияға тиклемге Россияла ауыл ерендәге түбәнге полиция дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше. *Ауылға стражник килһә инде — ул тиккә булмай.* А. Карнай. *Стражниктар тураһында Тимерҙең атаһы күп һөйләй торғайны. Улар ҡурҡыныс, әҙәм ҡанын эсә торған нәмәләр икән.* Б. Бикбай.

**СТРАМ** [*рус.* срам] *и. һөйл.* Оят, хурлыҡ.

**СТРАТЕ́Г** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Стратегияны (1 мәғ.) яҡшы белгән кеше, полководец.

**2.** *күсм.* Ижтимағи, политик көрәшкә етәкселек итеү оҫтаһы. *Беҙ фильмда К. Маркс менән Ф. Энгельсты революцияның бөйөк стратегтары итеп күрәбеҙ.* Р. Солтангәрәев.

**СТРАТЕГИК** *с.* **1.** Стратегияға мөнәсәбәтле. *Партияның стратегик планы. Стратегик принцип.*

**2.** Һуғыштың дөйөм маҡсаты күҙлегенән әһәмиәт тотҡан, стратегия (1 мәғ.) талаптарына яуап биргән. *Стратегик ҡорал. Стратегик оборона. Стратегик резерв. Стратегик сырье.* / Эре, үҙаллы хәрәкәт иткән бөтөн бер армия хәрәкәтенә мөнәсәбәтле. *Стратегик авиация. Стратегик разведка. Стратегик тыл. Стратегик фронт.*

**3.** *күсм.* Ниндәйҙер мәлдә дөйөм бер оло маҡсатҡа ирешеү өсөн әһәмиәтле. *Стратегик тактика.*

**СТРАТЕ́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Эре хәрби операцияларҙы һәм дөйөм һуғышты алып барыу оҫталығы. *Һөжүм стратегияһы.* / Һуғыш алып барыу тураһындағы фән. *Стратегия буйынса лекциялар. Стратегия курсы.*

**2.** *күсм.* Ижтимағи, политик көрәшкә етәкселек итеү оҫталығы. *Пролетариаттың синфи көрәш стратегияһы. Революцион стратегия. Экономик стратегия.*

**СТРАТИГРАФИК** *с.* Стратиграфияға мөнәсәбәтле. *Стратиграфик карта. Стратиграфик схема.*

**СТРАТИГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.* + *гр.*] *и.* Тарихи геологияның тау тоҡомдары яһалышындағы эҙмә-эҙлекте һәм уларҙың тәүге урынлашыу тәртибен өйрәнә торған бүлеге.

**СТРАТИСФЕ́РА** [*рус.* ⟨ *лат.* + *гр.*] *и.* Ер ҡабығының ултырма тау тоҡомдарынан торған өҫкө ҡатламы.

**СТРАТОНА́ВТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Стратосфераға осоусы.

**СТРАТОСТА́Т** [*рус.* ⟨ *лат.* + *гр.*] *и.* Стратосфераға күтәрелеү өсөн булған аэростат.

**СТРАТОСФЕ́РА** [*рус.* ⟨ *лат.* + *гр.*] *и.* Атмосфераның тропосферанан өҫтәге ҡатламы. *Стратосфераның метеорологик параметрҙары. Стратосфераның юғарғы сиге. Стратосфераның түбәнге сиге.*

**СТРА́УС** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. ҡар.* **дөйәғош.**

**СТРАХОВА́НИЕ** [*рус.*] *и.* Бәлә-ҡазаға дусар кеше йәки ойошманың күргән зыянын алдан түләнә килгән регуляр взнос иҫәбенә аҡсалата ҡаплау сараһы. *Дәүләт страхованиеһы. Ирекле страхование. Мәжбүри страхование. Мөлкәт страхованиеһы. Страхование договоры. Страхование агенты. Страхование аҡсаһы. Страхование взносы. Страхование ҡасаһы. Страхование операцияһы. Страхование фонды.*

**СТРАХОВА́ТЬ** [*рус.*]: **страховать итеү** *ҡар.* **страховкалау.**

**СТРАХО́ВКА** [*рус.*] *и.* Страхование хаҡы; билдәле шарт буйынса зыян күргәндә түләнә торған хаҡ. *Страховка алыу. Страховка түләү.*

**СТРАХОВКАЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **страховкалау.** *Страховкаланған йорт.*

**СТРАХОВКАЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **страховкалау.**

**СТРАХОВКАЛАУ** *ҡ.* **1.** Страхованиеға беркетеү, теркәү. *Йорт-ҡураны страховкалау. Ғүмерҙе страховкалау.*

**2.** Берәй спорт элементы башҡарған кешене ҡолауҙан һаҡлау. *Гимнасты страховкалау. Акробатты страховкалау.*

**СТРЕЛЁЦ** [*рус.*] *и. тар.* 16—17 быуат Рус дәүләтендә махсус даими ғәскәргә инеп, атыу ҡоралы менән ҡоралланған йомошсо хеҙмәткәр. *Стрелецтар полкы.*

**СТРЁЛКА** [*рус.*] *и.* **1.** Рельслы юлдарҙа транспортты бер юлдан икенсеһенә күсерә торған ҡулайлама. *Тимер юл стрелкаһы. Трамвай стрелкаһы.*

**2.** Төрлө үлсәү приборҙарында күсәрендә әйләнеп торған башы осло йоҡа тар пластинка; тел. *Компас стрелкаһы. Магнит стрелкаһы.* ■ *Сәғәт стрелкаһы көндөҙгө берҙе күрһәтте.* Ә. Ихсан.

**СТРЕЛКАСЫ** *и.* Тимер юл стрелкаһын күсереп тороусы эшсе. *Стрелкасы будкаһы.*

**СТРЁЛЬБИЩЕ** [*рус.*] *и.* Утлы ҡоралдан атырға өйрәнә торған махсус майҙан. *Иртәгеһенә стрельбищела снайперҙар ярышы уҙғарылды.* С. Әлибаев.

**СТРЕПТОКО́КК** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Төрлө ауырыу тыуҙырған йомро бөртөксә рәүешендәге, ишәйгәндә сылбыр хасил иткән бактерия төрө. *Стрептококк ангинаһы.*

**СТРЕПТОМИЦИ́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Үпкә сирен һ. б. ауырыуҙарҙы дауалай торған антибиотик дарыу.

**СТРЕПТОЦИ́Д** [*рус.* ⟨ *гр.* + *лат.*] *и.* Төрлө йоғошло ауырыуҙы дауалай торған дарыу.

**СТРЕСС** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Кеше йәки хайуан организмында төрлө кире йоғонтоға (һыуыҡҡа, аслыҡҡа, ауыр кисерешкә һ. б.) ҡаршы тороу рәүешендә барлыҡҡа килгән көсөргәнешле хәл. *Стресс ситуацияһы. Стресс факторы.*

**СТРИХНИ́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Бер төр тропик үҫемлек орлоғонан алынған көслө ағыу (медицинала ҡулланыла).

**СТРО́Й** [*рус.*] *и.* **1.** *ҡар.* **саф**[1] 1.

**2.** *ҡар.* **ҡоролош** 2, 3.

**СТРО́НЦИЙ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Химик элемент, еңел, ялтыр аҡ металл (радиоактив изотоптары ғилми тикшеренеүҙәрҙә һәм техникала ҡулланыла).

**СТРОФА́** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. әҙ.* Шиғырҙың билдәле бер үлсәм, ритм, интонацион-синтаксик төҙөлөш менән, ә рифмалы шиғырҙарҙа урынлашыу тәртибе яғынан да бәйләнгән бер өлөшө. *Таҡмаҡтың ҡыҫҡа йыр менән формаль оҡшашлығы шун-*

*да: уның да строфаһы, кыҫка йырҙағы кеүек, минималь ижекле дүрт юлдан тора, ләкин бында ритм айырыуса асык.* Ә. Харисов. *[Үлмәҫбай поэмаһында] строфалар, йыр куплеттары кеүек, төҙөк һәм йырлап тормалы.* Ғ. Хөсәйенов.

**СТРОФИКА** [*рус.*] *и. әҙ.* **1.** Шиғыр тураһындағы фәндең строфалар төҙөлөшөн өйрәнгән тармағы.

**2.** Шиғырҙың строфаларға бүленеше. *Кобайыр строфикаһы. «Евгений Онегин» строфикаһы. Поэманың строфика төҙөлөшө.*

**СТРУКТУР** [*рус.* структурный] *с.* Структураға мөнәсәбәтле. *Иретмәнең структур элементтары. Структур схема. Структур үҙгәрештәр.* **Структур анализ** матдәнең төҙөлөшөн тикшереү ысулдары һәм шул ысулдар менән тикшереү эше.

**СТРУКТУРА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Нимәнелер төҙөгән өлөштәрҙең үҙ-ара урынлашыуы һәм бәйләнеше; эске төҙөлөш. *Геологик структура. Нефтле структура. Металдың структураһы. Тау тоҡомдарының структураһы. Телдең структураһы. Әҙәби әҫәрҙең структураһы.* ■ *Тупраҡтың структураһын һаҡлауҙа һәм уның гумус менән байытылыуында органик ашламаның тотҡан урыны бигерәк тә ҙур.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 29 ғинуар. / Нимәнеңдер ҡоролошо, ойошторолоу рәүеше. *Социаль структура. Дәрес структураһы. Ижтимағи производствоның структураһы. Йәмғиәттең экономик структураһы. Малсылыҡтың структураһы. Армияһының структураһы. Сәсеү майҙанының структураһы. Хужалыҡтың структураһы.* ■ *Башҡортостандың структураһы бик ҡатмарлы. Ул йөҙ иллеләгән төрлө тармаҡты үҙ эсенә ала.* М. Хисмәтов.

**СТРУКТУРАЛИЗМ** [*рус.*] *и.* Гуманитар фәндәрҙә структур ысулды, семиотика элементтарын, моделләштереүҙе, формаль һәм математик ысулдарҙы файҙаланыу менән бәйләнгән йүнәлеш. *Хәҙерге совет тел белемендә структурализм тигән йүнәлеш киң таралды.* Ж. Кейекбаев. *Хәҙерге лингвистикалағы структурализм тигән ағымдың эш методы — математик статистика.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 24 ғинуар.

**СТРУКТУРАЛИСТ** [*рус.*] *и.* Структурализм яҡлы кеше.

**СТРУКТУРАЛИСТИК** *с.* Структурализмға, структуралистҡа мөнәсәбәтле. *Структуралистик теория. Тел ғилемендәге структуралистик йүнәлеш.*

**СТРУКТУРАЛЫ** *с.* Үҙенә бер төрлө, үҙенә башҡа структураға эйә булған. *Структуралы минералдар. Структуралы тупраҡ.*

**СТРУКТУРАЛЬ** [*рус.* структуральный] *с. махс.* Структурализм принциптарына нигеҙләнгән. *Тикшереүҙең структураль ысулы.*

**СТУДЕНТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Юғары уҡыу йорто уҡыусыһы. *Институт студенты. Студент билеты. Студенттар ятағы. // Студент ҡыҙ.* ■ *Юғары уҡыу йорттарының студенттары ҡышҡы каникулға таралыша башланы.* Б. Бикбай. *Яратам мин йөрәкһенеп үткән студенттың ҡыҫҡа төндәрен, .. эшкә сумған һынау көндәрен.* Р. Ғарипов.

**СТУДИЯ** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Рәссам йәки скульптор мастерскойы. *Рәссамдар студияһы. Һынлы сәнғәт студияһы.*

**2.** Уҡыу дәрестәре ижади тәжрибә менән бергә алып барылған сәнғәт мәктәбе. *Музыка студияһы. Хор студияһы. Театр студияһы. Студияла уҡыу.* ■ *Талантлы бер төркөм йәштәр, Мәскәү консерваторияһының башҡорт студияһын тамамлап ҡайтып, халыҡ араһына тәү тапҡыр сыҡтылар.* Б. Бикбай.

**3.** Киноға, фотоға төшөрөү йәки телевидение һәм радио тапшырыу эштәрен башҡарған ойошма. *Кино студияһы. Радио студияһы. Телевидение студияһы.*

**СТЮАРДЕССА** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Самолёт йәки караптағы пассажирҙарҙы хеҙмәтләндергән ҡатын-ҡыҙ. *Стюардесса булып эшләү.*

**СУББОТНИК** [*рус.*] Дөйөм файҙаға ял көнөндә ойошторолған ирекле ҡумәк эш (башта шәмбе көндәрҙә үткәрелер булған). *Субботник үткәреү.* ■ *Бухгалтер беҙгә председателдән алып тотош ауыл халҡының юл төҙөү эшенә субботникка китеүҙәре тураһында һөйләне.* А. Игебаев.

**СУБОРДИНАЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* Хеҙмәт тәртибе ҡағиҙәләре нигеҙендә дәрәжәһе кесе кешенең өлөләрға ҡаты буйһоноуын талап иткән система. *Субординация һаҡлау.*

**СУБПОДРЯД** [*рус.*] *и. махс.* Төп подрядсының ниндәйҙер эштең бер өлөшөн эшләтеү өсөн махсус ойошма йәки айырым кеше менән төҙөлгән килешеүе. *Субподряд ойошмалары. Субподряд буйынса эшләү.*

**СУБСИДИЯ** [*рус.*] *и.* Аҡса йәки материал менән күрһәтелгән ярҙам. *Дәүләт субсидияһы. Субсидия алыу. Субсидия биреү.*

**СУБСИДИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **субсидиялау.** *Субсидияланған ойошма.*

**СУБСИДИЯЛАУ** *ҡ.* Субсидия менән тәьмин итеү; субсидия биреү. *Төҙөлөштө субсидиялау.*

**СУБСТАНТИВ** [*рус.* субстантивированный] *с. лингв.* Исем категорияһына күскән (башҡа һүҙ төркөмөнә ҡарата); исемләшкән. *Субстантив сифат. Субстантив сифат ҡылым.*

**СУБСТАНТИВАЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. лингв.* Башҡа һүҙ төркөмдәренең исем категорияһына күсеүе; исемләшеү. *Һүҙ яһалыш субстантивацияһы.*

**СУБСТАНТИВЛАШЫУ** *ҡ.* Исем категорияһына күсеү (башҡа һүҙ төркөмдәренә ҡарата); исемләшеү. *..ғасаҡ, ғәсәк ялғаулы сифат ҡылым субстантивлашҡанда күплек һәм бөтә эйәлек ялғауҙары менән төрләнергә мөмкин: киләсәгем, киләсәгең, киләсәге, киләсәктәре.* Х. Йосопов.

**СУБСТАНЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *филос.* Объектив булмышы тәүге нигеҙ булған материяның, бөтә нәмә һәм күренештең асылы. *Материаль субстанция. Рухи субстанция. Материя субстанцияһының асыҡланыуы.*

**2.** *кит.* Нимәнеңдер нигеҙе, асылы. *Тупраҡтың минераль субстанцияһы. Һәр осор художестволы әҙәбиәтендәге субстанция.*

**СУБСТРАТ** [*рус.* ⟨ *фр.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *махс.* Нимәлер урынлашҡан нигеҙлек; нимәгәлер нигеҙ булған нәмә. *Биологик субстрат. Ер ҡабығының базальт субстраты. Тупраҡтың субстраты.*

2. *филос.* Ниндәйҙер күренештәрҙең дөйөм нигеҙе, бер төрлө күренештәрҙең уртаҡ нигеҙе. *Философик субстрат. Психик күренештәрҙең материаль субстраты.*

**СУБТИТР** [*рус.*] *и.* Кинофильм кадрҙарының аҫтына ғәҙәттә сит телдә һөйләгәнде тәржемә итеп яҙған текст.

**СУБТИТРЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **субтитрлау**. *Субтитрланған фильм.*

**СУБТИТРЛАУ** *к.* Субтитрлы итеү. *Субтитрлау мастерскойы.*

**СУБТРО́ПИК** [*рус.* субтропики] *и.* Ер шарының тропик бүлкәт менән урта бүлкәт араһындағы физик-географик зонаһы. *Дымлы субтропик.*

**СУБТРОПИ́К** *с.* Ер шарының тропик бүлкәте менән урта бүлкәте араһында урынлашҡан. *Субтропик зона. Субтропик район.* / Ошо урынлашҡан зонаға хас. *Субтропик климат. Субтропик культура.*

**СУБЪЕ́КТ** *и.* **1.** *филос.* Практик эш башҡарған һәм донъяны танып белгән кеше йәки социаль төркөм. *Танып белеү субъекты һәм объекты.*

**2.** *кит.* Ниндәйҙер эштә актив ҡатнашҡан кеше йәки төркөм, коллектив, ойошма.

**3.** *юр.* Билдәле хоҡуғы һәм бурысы булған кеше йәки ойошма. *Хоҡуҡ субъекты.* **Енәйәт субъекты** енәйәт эшләгән һәм шуның өсөн яуапҡа тарттырылырға тейешле кеше.

**4.** *грам.* Һөйләмдең эйәһе, шулай уҡ эш башҡарыусыны күрһәткән грамматик форма. *Грамматик субъект. Семантик субъект.*

**СУБЪЕКТИВ** [*рус.* субъективный] *с.* **1.** Субъект, кеше, шәхес ҡарашына ҡағылған. *Енәйәттең субъектив яғы. Тарихтағы субъектив фактор.*

**2.** Билдәле бер субъектҡа ғына хас; шәхси. *Субъектив тойғо. // Субъектив фекерләү һәләмтәһе.* ■ *[Шигырҙа] артабан шағирҙың субъектив донъяһындағы предмет үҙенең предмет булыуын юғалта.* М. Ғәли. / Объектив булмаған, алдан үҙенсә уйланған, ғәҙел түгел. *Субъектив ҡараш. Субъектив фекер.*

**СУБЪЕКТИВИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* **1.** Ысынбарлыҡҡа объектив баһа бирмәгән, тәбиғәттең һәм йәмғиәттең закондарын танымаған кире ҡараш. / Буржуаз социологияла йәмғиәт үҫеше объектив закондар менән түгел, э субъектив факторҙар (айырым кешеләрҙең ихтыяры, теләге) менән билдәләнә тип раҫлаған йүнәлеш.

**2.** *кит.* Объектив булмаған, сикләнгән субъектив ҡараш. *Эшкә субъективизм ҡамасаулай.*

**СУБЪЕКТИВИ́СТ** [*рус.*] *и.* Субъективизм (1 мәғ.) яҡлы кеше.

**СУБЪЕКТИВИСТИК** *с.* Субъективизмға һәм объективлыҡҡа мөнәсәбәтле. *Субъективистик фекер. Субъективистик рәүештә аңлатыу.*

**СУБЪЕКТИВЛЫҠ** *и.* Дөрөҫлөктө иҫәпкә алмаған субъектив мөнәсәбәт. *Эште баһалауҙа субъективлыҡ күрһәтеү.*

**СУБЫР** *окш.* Һыуҙың, тирҙең, күҙ йәшенең һ. б. тамсы-тамсы булып ҡапыл ағып киткәнен белдергән һүҙ. *Субыр итеп ҡалыу.*

**СУБЫРЛАТЫУ** *к.* Субыр-субыр иттереү, субыр-субыр килтереү. *Субырлатып һыу ҡойоу.* ■ *Ҡарты-йәше, бала-сағаһы баштарын эйеп, .. күҙ йәштәрен субырлатып, тәүге уҡытыусыбыҙҙың мәктәп эргәһендәге өйөнә табан ағылды.* Н. Мусин.

**СУБЫРЛАУ** *к.* Субыр-субыр итеү, субыр-субыр килеү. *Һәр ваҡыт эҫе мейес алдында тороп эшләүгә өҫтәге кейемдең тиген ере ҡалмай лыс һыу була, тир субырлап тора.* Ж. Кейекбаев. *Ул түҙмәгән, ҡурайын алған да, шыңғырлатып уйнап ебәргән. Бейә һауып ултырған бисәләрҙең күҙенән субырлап йәш аҡҡан, йәйләүҙә хәрәкәт туҡтаған.* Ә. Вахитов.

**СУБЫРЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **субырлау.** *Тик тамсылар көмөш ишкәктәрҙән субырлашып һыуға ҡойола.* Р. Ғарипов.

**СУБЫР-СУБЫР** *окш.* Ҡабат-ҡабат субыр иткәнде белдергән һүҙ. *Субыр-субыр тир аға. Субыр-субыр йәш тама.*

**СУВЕНИ́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Иҫтәлекле бүләк; иҫтәлекле нәмә. *Башҡорт сувенирҙары. Сувенир биреү.*

**СУВЕРЕНИТЕ́Т** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. кар.* **суверенлыҡ.** *Дәүләт суверенитеты.*

**СУВЕРЕНЛЫ** *с.* **1.** Юғарғы власть тотҡан. *Суверенлы хаким. Халыҡтың суверенлы ихтыяры.*

**2.** Суверенлыҡҡа эйә, суверенлыҡҡа мөнәсәбәтле. *Суверенлы дәүләт. Суверенлы хоҡуҡ.*

**СУВЕРЕНЛЫҠ** *и.* Халыҡ-ара хоҡуҡта: дәүләттең эске һәм тышҡы эштәрҙәге үҙ аллығы, бойондороҡһоҙлоғо; суверенитет. *Дәүләттәрҙең суверенлығы. Халыҡтарҙың суверенлығы. Суверенлыҡ алыу. Суверенлыҡты боҙоу.*

**СУҒЫЛЙЫ́М** *с.* Суҡ [2] (1 мәғ.) булып үҫкән. *Суғылйым муйыл.* ■ *Суғылйым суҡ ҡарағат тәлгәшен түбән эйгән.* А. Игебаев.

**СУҒЫРМАҠ** *и.* **1.** Нимәнеңдер өҫтө ныҡ ярғысланып, телгеләнеп, сурайып ҡалҡып ҡатҡандан барлыҡҡа килгән ҡытыршы урын. *Юл суғырмағы. // Суғырмаҡ юл.* ■ *[Ғүмәровты] сисендереп, ҡутырлап суғырмаҡ булып ҡатҡан яраларын .. йыуҙыҡ.* Ф. Иҫәнғолов. *Шаҡылдап туңған суғырмаҡ ер өҫтөнә лә боҙҙан уҡа ауҙар һуҙылған.* З. Биишева.

**2.** Ҡарт ағастың олон төбөндәге телгеләнеп, ҡытыршы булып торған ҡалын ҡабығы. *Имән суғырмағы. Тирәк суғырмағы.* ■ *Ҡайын суғырмағынан дегет ҡайнатып, .. арыш, бойҙай йә арпаға алыштырырҙар ине.* М. Тажи.

**СУҒЫРМАҠЛАНЫУ** *к.* Суғырмаҡҡа әйләнеү, суғырмаҡлы булыу. *Суғырмаҡланған ағас ҡабығы. Суғырмаҡланған юл.* ■ *Суғырмаҡланып туңған юлда сана табандарының шығырлауы әллә ҡайҙарға яңғырап ишетелә.* Ф. Иҫәнғолов. *Суғырмаҡланып туңған боҙ көн үҙәгендә йәш ҡойорға тотона.* А. Игебаев.

**СУҒЫРМАҠЛАУ** *к.* Суғырмаҡҡа әйләндереү, суғырмаҡлы итеү. *Туңып та бөтмәгән ерҙә машина йөрөп, юлды суғырмаҡлап бөткән.* ■ *Мин бәләкәй саҡта «атайымдың бите нишләп шыма түгел икән» тип аптырай торғайным. Сәсәк ауырыуы шулай суғырмаҡлаған икән уны.* Ш. Янбаев.

**СУҒЫРМАҠЛЫ** *с.* Суғырмаҡ ҡаплаған, суғырмаҡланған. *Суғырмаҡлы юл. Суғырмаҡлы ҡайын.* ■ *Михайло менән Вася эргәләге йыуан-йыуан ике ҡайындан .. суғырмаҡлы ҡабыҡтар*

*йыйып килтерҙеләр ҙә ут яғып ебәрҙеләр.* Ғ. Ибраһимов. *Суғырмаҡлы урам таштарын утәнән утә ҡыҙҙыра ҡояш.* Р. Бикбаев.

**СУҒЫРТМАҠ** *и. диал.* Суғырмаҡ.

**СУД** [*рус.*] *и.* **1.** Граждандар араһындағы төрлө низағ һәм енәйәт эшен ҡараған дәүләт органы. *Халыҡ суды. Судҡа биреү.* ■ *Андреевтың эшен .. һалдаттар араһында восстание яһарға теләгән тип, полевой судҡа тапшырҙылар.* Д. Юлтый. *Бөтә судтарҙа гражданлыҡ һәм енәйәт эштәрен ҡарау коллегиаль рәүештә, тәүге инстанция судында халыҡ заседателдәре ҡатнашлығында гәмәлгә ашырыла.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. **Суд эше** суд органдарының законда ҡаралған тәртип нигеҙендә низағ һәм енәйәт эштәрен хәл итеү өлкәһендәге эшмәкәрлеге. / Шул органда хөкөм сығарған хеҙмәткәрҙәр, судьялар. *Суд кәңәшмәһе.*

**2.** Шул органдың билдәле бер эште тикшереүе. *Судһыҙ төрмәгә ябыу. Суд яһау.* ■ *[Булат:] Ул [Гәрәй] әллә ҡасан лишен прав! Судта һөйләр һуҙен!* Б. Бикбай. *[Прокурор — Сәлихкә:] Һинең завты, теге Әмирхановты, судҡа тиклем ҡулға алдыҡ.* С. Агиш. **Асыҡ суд** тәрбиәүи маҡсат менән күмәк халыҡ алдында яһалған суд. / Эште тикшергән шул органдың ултырышы. *Суд процесы. Судҡа алып килеү. Судҡа барыу. Судта ҡарау.* ■ *Суд ваҡытында Саҡай Солтанов .. Фәгиләнең һәләкәте өсөн дә үҙе гәйепле булыуын таныны.* Б. Бикбай. *БАССР граждандарына шәхестең тейелмәҫлеге гарантиялана. Суд ҡарарынан тыш йәки прокурор санкцияһынан башҡа бер кемдең дә ҡулға алыныуы мөмкин түгел.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

♦ **Иптәштәр суды** коллектив ағзаларынан һайланып, йәмәғәт тәртибен боҙоу, боларыу кеүек ваҡ эштәрҙе ҡарай торған йәмәғәт суды. **Мировой суд** *тар.* ваҡ граждандар эшен ҡарау өсөн һайланған йәмәғәт суды.

**СУДЛАШЫУ** *ҡ.* Суд аша дәғүәләшеү. *Күрше менән судлашыу. Судлашып йөрөү.* ■ *Азамат залға ингәндә .. бер ир менән ҡатын судлаша ине. Улар бер-береһенә ниндәй генә яла яҡманы.* Ә. Бикчәнтәев.

**СУ́ДНО** [*рус.*] *и. ҡар.* **карап.** *Һаҡсы судно. Йөк судноһы. Пассажирҙар судноһы.*

**СУДОПРОИЗВО́ДСТВО** [*рус.*] *и. шул уҡ* **суд эше** (*ҡар.* **суд** 1).

**СУДОХО́ДСТВО** [*рус.*] *и.* Карап йөрөшө. *Диңгеҙ судоходствоһы. Йылға судоходствоһы. Судоходство ҡағиҙәләре.*

**СУДЬЯ́** [*рус.*] *и.* **1.** Суд эше буйынса хөкөм сығарған вазифалы кеше. *Халыҡ судьяһы.* ■ *Судья — закон һаҡсыһы. Законда ни ҡаралған — ул шуға таянып эш итә.* Х. Зарипов. *Судья .. ҡағыҙ тотҡан ҡулдарын эре генә итеп алға һуҙып, хөкөмдө уҡый башланы.* Ғ. Дәүләтшин. **Мировой судья** *тар.* мировой суд эшен алып барған судья (эре байҙарҙан һайланған).

**2.** *спорт.* Ярыш тәртибен, уйын ҡағиҙәләренең һаҡланышын күҙәткән кеше. *Халыҡ-ара категориялы судья. Матч судьяһы.*

**СУДЬЯЛЫҠ** *и.* **1.** Судья (1 мәғ.) вазифаһы. *[Акимов — Нуруллаға:] Һеҙҙе кандидатурағыҙ яңынан судьялыҡҡа күрһәтелеүе менән ҡотлайым.* Х. Зарипов.

**2.** *спорт.* Ярышты алып барыу эше. *Ярышта судьялыҡ итеү.*

**СУҘА** *и.* Дөйәнең муйынындағы һәм алғы тубығындағы оҙон йөн. // *Суҙа еп.*

**СУЙ** *с.* **1.** *һөйл.* Бик ҡаты, ныҡ. *Суй ағас. Суйға әйләнеү.*

**2.** Беше булған, тығыҙ (тәнгә ҡарата). *Суй тәнле ҡатын.*

**СУЙЫН** [*рус.* чугун] *и.* **1.** Тимер менән углеродтың ҡорос итеп эшкәртеү йәки ҡойолған изделиелар әҙерләү өсөн ҡулланылған иретмә һе. *Суйын иретеү.* // *Суйын күпер. Суйын мейес.* ■ *Хисап дәреслегенә ингән миҫалдарҙа һуҙ күберәген суйын ҡойоу, ҡорос иретеү, домна, мартен цехы хаҡында бара.* М. Тажи.

**2.** Шул иретмәнән ҡойолған сүлмәк. *Суйында аш бешереү.* // *Суйын сүлмәк.* ■ *Тимер .. суйындағы ашты алып ашағас, колхоз правлениеһына китте.* Б. Бикбай. *Суйын сүлмәк, тар котелок, бешә һалдат аштары* (Бәйеттән).

♦ **Суйын кеүек ҡара** ҡап-ҡара.

**СУЙЫР** *и. һөйл.* Һуйырташ.

**СУЙЫРТАШ** *и. ҡар.* **һуйырташ.** *Кешеләр .. ямғыр теләп урамға сыҡты, аҡ ҡорбандар салды, өшкөртөп, Оло Эйеккә суйырташтар ырғытты.* З. Биишева.

**СУҠ**[1] *и.* **1.** Бер осон ҡуша төйөп, икенсеһен һалындырып ҡуйған биҙәүес. *Билғау суғы. Йүгән суғы. Ышлыя суғы.* ■ *Бәһәүкәй ҡыҙыл таҡыяны, суғын ҡолаҡ яғына һалындырып, ҡырынырак кейгән.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Ҡуйы булып ялбырлап торған ағас йәки ботаҡ осо. *Талғын иҫкән дымлы ел иркенә күрән суғын болғай сирендәр.* Ә. Вәли.

**3.** Алҡа, беләҙеккә сылтыратып таҡҡан ваҡ-ваҡ тәңкә. *Беләҙек суғы. Йөҙөк суғы. Ҡаптырма суғы. Сулпы суғы.* ■ *Зөлхизәнең .. сәс толомдарына тағылған көмөш сулпыһының суҡтарын еләҫ ел сыңлатып уйнай.* З. Биишева.

**4.** *диал. ҡар.* **сәсәк** [2]. *Ашъяулыҡ суғы. Уҡа суҡ.* ■ *Разия шәл суғын борғоларға, бармағына урарға тотондо.* Н. Мусин.

♦ **Ҡолаҡса суҡ** *диал.* ҡолаҡсуҡ. **Ҡул суғы** *шул уҡ* **ҡул осо** 1 (*ҡар.* **ҡул** [1]). **Маңлай суғы** 1) ҡашмауҙың маңлайға төшөп торған сулпыһы; 2) *шул уҡ* **кикел сәсе** (*ҡар.* **сәс** [1]). **Тамыр суғы** үҫемлектең яҡшы үҫешкән тамыр системаһы.

**СУҠ**[2] *с.* **1.** Күп булып өйкөлөп торған емешле. *Суҡ ҡарағат. Суҡ муйыл.* ■ *Бер суғыраҡ муйылды эйелтәм тип, ҡайын ҡиҫкәһенә менеп баҫҡайным, ул серек булған икән, .. йығылдым.* Н. Мусин. *Суҡ еләктәр өҙгәнбеҙ, тәғәстәргә тиргәнбеҙ.* Б. Бикбай.

**2.** Ҡуйы ялбыр ботаҡлы. *Суҡ ҡайын. Суҡ тирәк.* ■ *Бара ғына бара мин ултырҙым суҡ сыуалҡай төбө һалҡынға* (Халыҡ йырынан).

**3.** *диал.* Өйкөм булып торған. *Суҡ болот. Суҡ урман.*

**СУҠ**[3] *с. иҫк. кит.* Күп булғанды белдерә. *Суҡ-суҡ (суктин-суҡ) сәләм.* ■ *[Ғариф:] Һиңә бисер кәрәкмәй, башта барсабыҙҙан суҡ-суҡ сәләмдәр яҙ.* Б. Бикбай. // *Һикенең уртаһына .. Ғиләж сыуал артынан бер көрәгә бал килтереп ултырт-*

*ты: — Суҡҡа бәрәкәт! — тиеште ҡунаҡтар.* Ж. Кейекбаев.

**СУҠ** [4] *(баш хәреф менән) и.* Саҡ-Суҡ бәйетендәге мифологик ике ҡоштоң береһе.

♦ **Саҡ менән Суҡ кеүек йәшәү** бер-берендә һағынып, күрешә алмай, айырым йәшәү.

**СУҠ** [5] *и. диал.* Сыу, сыуын.

**СУҠ** [6] *и. һөйл.* Ауылдың, урамдың билдәле бер тәңгәлдәге өлөшө. *Магазин арғы суҡта.* ■ *[Хәмит хат уҡый:] Урта суҡ зәңгәр күҙ Ғариф ҡыҙын урыҫ Хәсән малайына бирҙеләр.* Н. Ҡәрип.

**СУҠ** [7]: **суҡ турғай** *и. ҡар.* **бараба** [1].

**СУҠА** *и. диал. ҡар.* **суҡаҡ** 1.

**СУҠАЙТМА** *и. диал. ҡар.* **суҡаҡ** 1.

**СУҠАЙТЫУ** *к.* Тирә-яҡтағы нәмәләрҙән айырып күтәреү; һерәйтеү. *Суҡайтып ҡуйыу.* ■ *Багры йылғаһын буйлап теҙелеп киткән бер төҫтәге аҡ тирмәләр алдына суҡайтып усаҡтар сығарылған.* Т. Хәйбуллин.

**СУҠАЙЫУ** *к.* Тирә-яҡтағы нәмәләрҙән айырылып күтәрелеү; һерәйеү. *Сәрбиямал ябалаҡ шикелле суҡайып, иртәнсәктән бирле тауарҙары араһында ултыра.* З. Биишева.

**СУҠАЙЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **суҡайыу.** *Суҡайышып ултырыу.* ■ *Яндырылған күперҙең .. анда-һанда ҡара көйгән свайҙары ғына суҡайышып тора ине.* З. Биишева.

**СУҠАҠ** *и.* **1.** Нимәнеңдер ослайып сығып торған урыны. *Яр суҡағы. // Суҡаҡ маңлай.* ■ *Аҡтауҙың суҡағына ултырып, ул үҙенең йәрәхәт эҙҙәрен һанай торғайны.* Ш. Янбаев. *[Йәнтүрә:] Уң яҡта суҡаҡ булып, ослайып торған тау Ямашай тауы була.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**2.** Осло түбәле тау; сусаҡ. *Суҡаҡҡа менеү. // Суҡаҡ ҡая. Суҡаҡ тау.*

**СУҠАЛАҠ** *и.* Ләпәш түбәле, бәләкәй өй һ. б. *Суҡалаҡ башына менеү. // Суҡалаҡ өй.*

**СУҠАНЛАУ** *к.* Эйеләбөгөлә ни менәндер булыу; бөксәнләү. *Комбайнер .. бер малайҙың ниҙер сүпләп, суҡанлап йөрөгәнен күрҙе.* З. Биишева.

**СУҠЛАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Суҡ [1] (1 мәғ.) итеп һалындырыу. *Суҡландырып бәйләү.* ■ *[Ҡолморҙа старшина] билен ебәк билғау менән быуып, осон суҡландырып төшөргән.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Суҡ [1] (2 мәғ.) һымаҡ ялбыратыу. *Йәш ҡайын ҡуйы ботаҡтарын суҡландырып, кәбер өҫтөндә ойоп ултыра.* З. Биишева.

**СУҠЛАНЫУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **суҡлау** 1, 2. *Суҡланған беләҙек. Суҡланған билғау.*

**2.** Суҡ [1] (1, 2 мәғ.) булып ялбырау. *Суҡланып үҫкән тирәк.* ■ *[Егет] бүрек аҫтынан бөҙрәләнеп, суҡланып .. төшөп торған шоморт ҡара сәстәрен артҡа ҡайырып ташла[ны].* һ. Дәүләтшина. *Көмөш бәҫ менән суҡланған ағас ботаҡтары аҡрын һәм һәлмәк тирбәлә.* Ә. Чаныш.

**СУҠЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **суҡлау** 1, 2.

**СУҠЛАУ** *к.* **1.** Биҙәп, суҡ [1] (1 мәғ.) ҡуйыу, суҡлы итеү. *Төйөп суҡлау.* ■ *Пар атын суҡлап, тағып ҡуш ҡыңғырау, .. әй килер ҡунаҡ йыйынға күҙ ҡыҙҙырып.* Ш. Бабич. *Абзыҡайым, ҡара атыңдың ышлыяһын суҡлама* (Халыҡ йырынан).

**2.** Суҡ [1] (3 мәғ.) тағыу. *Беләҙекте суҡлау. Йөҙөктө суҡлау.*

**СУҠМАР** *и.* **1.** Йомро башлы күҫәк. *Имән суҡмар. Ҡайын суҡмар. Бүре суҡмары.* ■ *Иңшына уҡ-һаҙаҡ элеп, биленә суҡмар баулы ҡулына таш йомарлап сапҡын һалған Күсәрб* Т. Хәйбуллин. *Атаһы болан балаларын аңд ятып Урал ташынан, ҙур суҡмары менән һуғ йығып, елкәһенә һалып ташыған.* Б. Вәлит.

**2.** *күсм.* Бизмән таяғы.

♦ **Суҡмар күтәреү** һуғышырға, талашы[р]ынтылыу; күҫәк күтәреү. **Һуғыш суҡмары** һуғ[ы]шырға яратыусан кеше һ. б. *Планетабыҙ һуғы[ш] суҡмарҙарының ракета установкалары мен[ән] генә сыбарланып ҡалманы.* Н. Нәжми. *[Ғая:] Бәй, бәй, һуғыш суҡмары Фәрит түгелме һ[ин] был.* Ф. Әсәнов.

● *Һуғышҡа барған, суҡмарын оноҡҡан.* Ә[й]тем.

**СУҠМАРБАШ** *и.* Ҡатмарлы сәскәлеләр ға[ила]ләһенә ҡараған ҡыҙыл күк төҫтәге эре тупалса сәскәле билсән.

**СУҠМАРЛАУ** *к.* **1.** Суҡмар менән һуғыу *Суҡмарлап алыу.*

**2.** Суҡмар һымаҡ йомро башлы итеү. *Ул .. осо на тимер сыбыҡ ҡушып, суҡмарлап ҡуйған бүре һуҡҡыс ҡамсыһын һәлмәкләп ҡарап алды.* Б. Бикбай.

**СУҠМАРСЫ** *и.* Суҡмар менән ҡоралланған һуғышсы. *Суҡмарсыбыҙ үҙ дуҫына йоҙроҡ төйгән.* Й. Солтанов.

**СУҠМАРЫЛЫУ** *к. һөйл.* **1.** Өҫтө-өҫтөнә йыйылып, бергә ойошоу; уҡмашыу. *Ҡарағастың һағыҙы суҡмарылып тора.*

**2.** Тәлгәше ҙур, емеше күп булыуҙан һалынып төшөү. *Муйыл суҡмарылып ултыра.*

**СУҠРАҠ** [1] *и.* **1.** Тәгәрмәс, аяҡ йә башҡа нәмә менән иҙелеп, киҫәк-киҫәк булып ҡатҡан йәки туңған тупраҡ. *Был ҡуҡтәрҙән миңә тик наҙ яуа, был суҡраҡ та миңә һөйкөмлө.* Ә. Әхмәтҡужин.

**2.** *диал. ҡар.* **батҡаҡ** 1. *Суҡраҡты иҙә-иҙә ашыҡмайынса ғына арба тәгәрәй.* З. Хисмәтуллин.

**СУҠРАҠ** [2] *с. диал.* Һаңғырау.

**СУҠРАҠЛАНЫУ** *к.* Суҡраҡҡа [1] (1 мәғ.) әйләнеү. *Суҡраҡланған юл.*

**СУҠРАҠЛАУ** *к. диал.* Суҡраҡҡа, батҡаҡҡа әйләндереү.

**СУҠ-СУҠ** *окш.* Ваҡ ҡош, турғай тауышын белдергән һүҙ. *Суҡ-суҡ итеү.* ■ *Маянһылыу ҡоштоң суҡ-суҡ тигән тауышына уянып китте, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**СУҠТАЙ: суҡтай итеп кейенеү** бик яҡшы, матур итеп кейенеү. *Оло инәйем арҡаһында мин .. башҡа малайҙы урынына суҡтай итеп кейенеп алғанмын.* М. Кәрим.

**СУҠТАРЫЛЫУ** *к. диал.* Суҡмарылыу.

**СУҠЫ** *и. ҡар.* **суҡаҡ** 1. *Ағас араһынан бейек тау суҡылары һерәйеп ҡалҡа.* Ғ. Ибраһимов.

**СУҠЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **суҡыу.** *Суҡылған алма. Суҡылған ағас.*

**СУҠЫНДЫРЫУ** *к.* **1.** Кемдеңдер маңлайына, түшенә, ике яурынына төртөп, суҡынғандағы хәрәкәттәрҙе яһау. *Барыня балаларының икәүһен дә маңлайҙарынан үбеп .. суҡындырҙы.* һ. Дәүләтшина.

**2.** Христиан диненә күсереү. *Башҡа хөкүмәте*

.. *халыҡҡа бер нисә тиҫтә яңы һалым һала, көсләп суҡындыра башлай.* И. Аҡманов.

**3.** *күсм.* Юҡҡа сығарыу; дөмөктөрөү. *Суҡындыр! Миңә Өфөһөҙ йәшәүе мөмкин түгел.* Н. Нәжми.

**4.** *күсм.* Шәп иттереү; ойоҡһотоу, теттереү. *Суҡындырып эшләү. Суҡындырып йәшәү. Суҡындырып бейеү.*

♦ **Суҡындыраһыңмы ни уны** нисек итәһең, ни эшләмәк кәрәк тигән мәғәнәлә әйтелә. *Суҡындыраһыңмы ни уны, бөтә атайҙар кеүек минең дә .. ҡыҙымды фәрештә итеп йәшәткем килә лә тора!* Д. Исламов.

**СУҠЫНМЫШ** *и. кар.* **суҡынсыҡ.** // *Суҡынмыш әҙәм. Суҡынмыш бала, әллә ҡайҙа йөрөй бит.*

**СУҠЫНСЫҠ** *и.* Һүккәндә, шелтәләгәндә йәки орошҡанда әйтелә. *Тыныс ҡына тороп ятҡан сакта, ҡайҙан килеп сыҡты, суҡынсыҡ! Бына бәлә.* Б. Бикбай. *Ҡыҙҙар бит улар, суҡынсыҡтар, ҡыйыуыраҡ егеттәрҙе, телдәр, күҙгә инеп барғандарҙы яратыусан.* В. Исхаҡов.

**СУҠЫНЫУ** *к.* **1.** Христиан динендә: бармаҡ менән алмаш-тилмәш маңлайға, түшкә, ике яурынға төртөп, хоҙайға табыныу. *Тәрегә суҡыныу.* ■ *Ул суҡынып алды: «Ярар, улһәм, бәхил бул»,— тип һыуға төштө.* Д. Юлтый.

**2.** Тейешле йолаһын башҡарып, христиан диненә күсеү. *Шәгәлиҙе, суҡынып, рус байына уллыҡҡа кергән икән, .. тип һөйләгәндәр.* Б. Бикбай.

**3.** *күсм.* Нимәгәлер мөкиббән китеү; табыныу. *Аҡсаға суҡыныу. Китапҡа суҡыныу.* ■ *[Әбей:] Һин бит баҡыр миҙалға суҡындың! Һин бит урыҫ байҙарының ишек алдына бәйләгән сыңйырлы эт булып ҡалғанһың! Дошман!* Т. Хәйбуллин.

**4.** *күсм. һөйл.* Юҡҡа сығыу; дөмөгөү. *Кешене кан илатҡайны, үҙе лә суҡынды.*

♦ **Суҡынғыры, суҡын** *йәки* **суҡынып киткер** эрләгәндә, ҡарғағанда йәки йән көйгәндә әйтелә. **Суҡынған** *йәки* **суҡынып** кемдеңдер эше, ҡылығы менән риза булмағанды белдерә. *[Хәсби:] Хисмәтуллаһы, суҡынып, эсеүҙән бушамай.* Ш. Насыров. *Анау бер көндө суҡынған Хәмди еңгәм .. табамды алып торғайны, бер яҡ ситен китеп алып килеп бирҙе.* Ғ. Дәүләтшин. **Һәр түрә үҙенсә суҡына** һәр кешенең эште үҙенсә эшләргә тырышҡанын күрһәткәндә әйтелә. *Тиҙҙән яңы хужа киләсәк. Һәр түрә үҙенсә суҡына тигәндәй, Касьянов та прииска үҙ закондарын индерәсәк, тип уйланды Нигмәтулла.* Я. Хамматов.

**СУҠЫТЫУ** *к. йөкм. кар.* **суҡыу** 2.

**СУҠЫУ** *к.* **1.** Суҡыш менән эләктереп алыу. *[Мәрхәбә:] Бынауы күлдәгем .. һалынып-һалпайып ҡалды. Тәнемә сәүкә суҡырлыҡ та ит ҡунмай.* М. Тажи. *Урман ҡошо ҡыҙ усынан емдәр суҡый, үҙе суҡый, үҙе гүйә рәхмәт уҡый.* М. Кәрим.

**2.** Суҡыш менән һуғыу, төртөү. *[Әсә:] Себеш суҡышы менән йомортҡаның ҡабығын туҡ-туҡ итеп суҡып тишә лә ҡанатын елпеп килә лә сыға.* К. Мәргән. *Бына ҡаҙ аяҡ-ҡулдарын суҡый башлай һиҙәйҙең.* К. Кинйәбулатова.

**СУҠЫШ** *и.* Ҡоштарҙың һәм ҡайһы бер йәнлектәрҙәң ослайып алға сыҡҡан һөйәк кеүек ҡаты мороно. *Кәкре суҡыш. Һоҫҡо суҡыш. Һыуҙы суҡыш менән һөҙөп эсеү.* ■ *Өкө ажарланып суҡышын шаҡылдатты.* Я. Хамматов. *Ҡыр ҡаҙҙары .. сыуалған йөндәрен суҡыштары менән рәтләй.* М. Ғафури.

**СУҠЫШЫУ** *к. урт. кар.* **суҡыу.** *Әҙәм балаһы түгел, күгәрсен балалары ла суҡышып ала.* С. Агиш.

**СУЛА** *и.* Уңайлы буш ваҡыт, яйы килгән ваҡыт араһы. *[Һалдат:] Ошо сулала вагондағы боеприпастарҙың бер өлөшөн вокзалға ташып ҡуяйыҡ.* Ж. Кейекбаев. *Сәфәр сыҡтым хәтәр сулаларҙа.* Й. Солтанов.

**СУЛАҠ** *с.* Ҡулы өҙөлгән йәки имгәнгән; һыңар ҡуллы. *Сулаҡ кеше. Сулаҡ ҡалыу.* ■ *Малай сакта шаянлығы менән терһәгенән ҡулын өҙҙөрҙө. Кеше әлгер, «сулаҡ Татлыбай» тип исем бирергә лә өлгөрҙө.* З. Биишева. *Мысыҡтың да ҡулы өҙөлә, сулаҡ булып ҡала.* «Алдар менән Зөһрә».

● *Һуҡыр тотһа, нык тотор; сулаҡ һуҡһа, нык һуғыр.* Әйтем.

**СУЛАҠЛЫҠ** *и.* Сулаҡ булыу хәле. *Асылда Янбайҙың сулаҡлығы атағына һис тә бәйләнмәгән. Ул бәләкәй сакта аласыҡ башынан йығылып, ҡулын имгәткән.* Ш. Насыров.

**СУЛЕМА́** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Хлорлы терегөмөштөң ағыулы аҡ онтағы һәм уның иҙмәһе (дезинфекция өсөн ҡулланыла). *Сулема иретмәһе.*

**СУЛПАН** (*баш хәреф менән*) *и.* **1.** *астр.* Ҡояштан икенсе торған планета; Ергә иң яҡын торған яҡты йондоҙ; Зөһрә. *Таң сулпаны. Сулпан ҡалҡа. Сулпан йондоҙо.* ■ *Ҡояш байышы яғында эңер сулпаны йымылдап тора.* З. Биишева.

**2.** Ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ исеме.

**СУЛПЫ**[1] *и.* Ҡаҙандан һалма, ит, бауырһаҡ кеүек нәмәне һөҙөп ала торған тишекле йәки үргән сүмес; һалмалғыс. *Фариза һалманы сулпы менән һоҫоп, .. кәйнәләре эргәһенә урындыҡ өҫтөнә килтереп ҡуйҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**СУЛПЫ**[2] *и.* **1.** Ҡатын-ҡыҙҙың уртаға ҡаш ҡуйып, өс буй тәңкә тояҡ төшөрөп яһаған биҙәүесе (сәсүрмескә, ҡашмауға тағыла). *Көйәнтәле сулпы. Ҡуш сулпы.* ■ *Ике оҙон ҡалын толомо ике яурыны аша алға әйләнеп төшкән, остарындағы сулпылар һәлмәк кенә сайҡала.* Һ. Дәүләтшина. *[Зөлхизәнең] сәс толомдарына тағылған көмөш сулпыһының .. суҡтарын еләҫ елдәр сыңлатып уйнай.* З. Биишева. *Ҡоҙағыйҙар .. сулпылы ҡашмауҙарын .. кейеп алды.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *диал. кар.* **суҡ**[1] 3.

**СУЛЬФА́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. хим.* Көкөрт кислотаһының тоҙо. *Аммоний сульфаты.*

**СУЛЬФАТЛЫ** *с. махс.* **1.** Сульфат ҡатнаш. *Сульфатлы тағырлауыҡ. Сульфатлы тупраҡ.*

**2.** Сульфат ярҙамында алынған; сульфат менән эшкәртелгән. *Сульфатлы һабын. Сульфатлы целлюлоза.*

**СУЛЬФИ́Д** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. хим.* Көкөрт менән металл берләшмәһе. *Сульфид рудаһы. Органик сульфид. Тәбиғи сульфид.*

**СУЛЬФИ́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Көкөртлө кислота тоҙо. *Натрий сульфиты.*

**СУЛЬФИТЛАУ** *к. махс.* Емеш-еләкте, йәшелсәне һ. б. көкөртлө кислота тоҙо, көкөртлө ан-

гидрид ҡушып консервалау. *Еләкте сульфитлау. Емеш һуттарын сульфитлау.*

**СУМАҘАН** [*рус.* чемодан ⟨ *фарс.*] *и.* Кейем-һалым һ. б. һалып юлға йөрөтөү өсөн бик ҡуйып эшләнгән, ҡапҡасы асылмалы, тотҡалы, ҙур тартма рәүешендәге ҡулайлама. *Күн сумаҙан. Йыйылмалы сумаҙан. Сумаҙанға кейем һалыу.* ■ *Сәгиҙә нәмәләрен тиҙ-тиҙ генә йыйыштырҙы ла сумаҙанын тотоп, палубаға сыҡты.* М. Тажи. *Бер сумаҙан алып ҡулына Сәйҙел тышҡа сыҡты.* Ғ. Сәләм.

**СУМАН** *и. диал. ҡар.* шүмән [1]. *Суман шыуыу.*

**СУМАР** [1] *и.* Йомортҡа менән һөткә баҫҡан ҡамырҙан өҙөп-өҙөп бешергән йомро һалма. [*Уңмаған килен] яталыр миҫле түмәр, торһа — бешерә сумар* (Бәйеттән).

◆ **Иштең ишәк сумарын** *ҡар.* ишеү [3].

**СУМАР** [2] *и. диал.* Күмәгәй.

**СУМАРТ** *с. диал.* Йомарт. *Сумарт кеше.*

**СУМАСА** *и. диал.* Сумғалаҡ өйрәк (*ҡар.* **өйрәк** 1).

**СУМБЫРЛАУ** *ҡ. ҡар.* **шомборлау.** *Таш һыуға сумбырлап төшөп китте.*

**СУМҒАЛАҠ** *и.* Сумғалаҡ өйрәк (*ҡар.* **өйрәк** 1).

**СУМҒЫС** *и.* Сумғалаҡ өйрәк (*ҡар.* **өйрәк** 1).

**СУМДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Һыуға йәки бүтән шыйыҡ нәмәгә күмелгәнсә төшөрөү. *Һыуға сумдырыу.* ■ *Миәстең иң тәрән еренә алып барҙы ла агайым мине сумдырып тороп ебәрҙе, йөҙөргә өйрәтте.* К. Кинйәбулатова. *Батша хәйләләшеп, байҙы каҙанға алдан сумдыра* (Әкиәттән).

**2.** Йомшаҡ, көрпәк нәмәгә тәрән итеп батырыу. *Ҡарға сумдырыу. Мамыҡ мендәргә сумдырыу.*

**3.** *күсм.* Кемгәлер нимәнелер күп итеп биреү; мулыҡтырыу. *Алтын-көмөшкә сумдырыу. Байлыҡҡа сумдырыу.*

**4.** *күсм.* Берәй хәлгә дусар итеү. *Ҡайғыға сумдырыу. Тиргә сумдырыу.* ■ *Уйҙары, тәгәрәп осо сеймәләнгән йомғаҡ кеүек, буталдылар ҙа Гөлйөҙөмдө тәлгын йоҡоға сумдырҙылар.* Һ. Дәүләтшина. *«Аҡъегет урманы» тип ниңә аталғанын ишеткәне бирле, .. ул мине әллә ниндәй эшкә ашмаҫ хыялдарға сумдырып бөтөрҙө.* Н. Мусин.

**5.** *күсм.* Ныҡ ҡына һуғыу; тондороу. *Берҙе сумдырып алыу.*

**СУМДЫРЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **сумдырыу** 1, 2. *Ҡарға сумдырышыу.*

**СУ́МКА** [*рус.*] *и.* Сепрәктән, күндән һ. б. тегелеп, ваҡ-төйәк һалып йөрөтә торған тоҡсай. *Баҙар сумкаһы. Китап сумкаһы. Ҡул сумкаһы. Патрон сумкаһы.* ■ *Балалар сумкаларын уйната-уйната дәрестән ҡайта.* С. Агиш. *Сөмбөл атаһының ялан сумкаһына кәрәкле ҡағыҙҙарын рәтләп һалды.* Ш. Янбаев.

**СУ́ММА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* **1.** *мат.* Ике йәки бер нисә һанды ҡушҡандан сыҡҡан һөҙөмтә; ҡушылдыҡ. *Ике һандың суммаһы. Сумманың квадраты. Сумманың кубы.*

**2.** Нимәнеңдер дөйөм миҡдары.

**3.** Күпмелер күләмдәге аҡса. *Сумма туплау.* ■ *Беҙ .. эште башлап ебәргәндә, уның мең һум да суммаһы юҡ ине.* С. Агиш.

**СУММАР** [*рус.* суммарный] *с. кит.* **1.** Ҡушҡандан барлыҡҡа килгән; дөйөм. *Суммар һан. Суммар ҡеүәт.*

**2.** Айырым ҡаралмаған, конкретлаштырылмаған; дөйөмләштерелгән. *Суммар мәғлүмәт.*

**СУМРАЙЫУ** *ҡ. диал.* Өңрәйеү.

**СУМСА** *и. диал.* Самбуса. *Үпкә-бауыр сумсаһы.*

**СУМТАЙ** *и.* Ата йәнлектең, хайуандың енси биҙ ҡабы; тоҡсай. *Тәкә сумтайы.*

**СУМЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **сумырыу** 1, 2. *Һыуға сумырылыу.*

**СУМЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Тотош батырыу. *Күнәкте сумырып һыу алыу.*

**2.** *күсм.* Мул итеп эләктереү; мул итеү. *Сумырып аҡса алыу. Сумырып ҡаймаҡ һалыу. Икмәкте сумыра ғына.*

**3.** *ҡар.* **һөйл.** **сумырыу.** *Рәхәтлеккә сумырыу. Һаламға сумырыу. Һыуға сумырыу.*

**СУМЫУ** *ҡ.* **1.** Һыуға йәки бүтән шыйыҡ нәмәгә төшөп, баштан аша күмелеү. *Сумып йөҙөү. Төпкә сумыу.* ■ *Тыуған йылға .. уны [Тимерҙе] йомшаҡ, йылы ҡосағына алып иркәләй, сумған һайын сумғы килә.* Б. Бикбай. *Ҡаҙ булып та сумды Гәббәс, өйрәк булып та сумды.* А. Игебаев. / Шыйыҡ йәки йомшаҡ нәмә эсенә күмелеү. *Мин дә батҡаҡҡа батып, сумып быҙауҙарҙы ҡыуам.* Ш. Бабич. *Инде батша үҙе лә ҡаҙанда ҡанаған һөткә сумып сығырға була. Ҡаҙанға төшә лә шунан сыҡмай, бешеп үлә* (Әкиәттән).

**2.** Берәй көрпәк, ҡабарып торған нәмә эсенә инеп күмелеү, батыу. *Креслоға сумып ултырыу. Мендәргә сумыу.* ■ *Ауыл осонда яртылаш ҡарға сумған бер өй.* Т. Хәйбуллин. *Ныязғол .. һаман да үҙенең түрендә яҫтыҡҡа сумып ултыра ине.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *күсм.* Ҡайҙалыр инеп китеү, күҙҙән юғалыу. *Ҡыҙҙар янына сумыу. Шаршау артына сумыу.* ■ *Ҡурай еләктәрен йырҙырып, Нуруллаңың аты ҡуйы урман шырлығына сумды.* Ш. Янбаев. *Иҙел аръяғына Ҡояш сумды, төн ҡалҡынды ярҙар аҫтынан.* Ғ. Сәләм.

**4.** *күсм.* Нимәгәлер мулығыу, күпләп эйә булыу. *Алтын-көмөшкә сумыу. Байлыҡҡа сумыу.*

**5.** *күсм.* Ниндәйҙер тойғо биләп алыу, уның тәьҫиренә бирелеү. *Тәрән уйға сумыу. Хискә сумыу.* ■ *Хыялдарға сумып ултырҙым мин Ирәндектең бейек ташында.* С. Кулибай. *Ал ҡабуллап, ал да һал шатлыҡҡа сумған күңелеңә тәбригемдең әсеһен.* Ш. Бабич. / Ниндәйҙер хәлгә төшөү, дусар булыу. ■ *Ныязғол ҡара тиргә сумды,.. кулъяулығын сығарып, битен, маңлайын, муйынын һөртте.* Һ. Дәүләтшина. [*Ирмен тигән ир кеше] йәшкә сумған үҙ йортон йыуатмай тынғы табырмы?* (Ҡобайырҙан).

**6.** *күсм.* Нимәгәлер тотош бирелеү, мөкиббән китеү. *Сумып эшләү.* ■ *Сәгиҙә баштан-аяҡ эшкә сумды, мәктәп эсендә генә бикләнеп ҡалманы.* М. Тажи. *Салих икмәк ашап, һыу эсте лә тағы китапҡа сумды.* Х. Мохтар.

**7.** *күсм.* Нимә менәндер солғап алыныу, уның тәьҫире аҫтында ҡалыу. *Ҡараңғылыҡҡа сумыу. Тәбиғәт матурлығына сумыу.* ■ [*Ҡояш:*] *Диңгеҙбикә, .. гел-гел шулай наҙлы тынлыҡҡа сумып, зәңгәр сәңгелдәктә ят!* З. Биишева. *Ҡубә-*

*лək тик йəм һөйə, гөл янында фырлай ул. Йəмгə сумған да ирекһеҙ гөлгə гишкын йырлай ул.* Ш. Бабич.

**СУМЫШЫУ** *к. урт. кар.* **сумыу** 1. *Сумышып һыу инеү.*

**СУҢКА** *и. диал.* Соңка.

**СУП** [1] [*ғəр.*] *и. иҫк.* Нəҫел.

**СУП** [2] *окш.* Тəрəн һыуға бəлəкəй тос нəмə төшкəндə, үпкəндə һ. б. шуларға оҡшаш хəлдə сыҡкан тауышты белдергəн һүҙ. *Суп иттереп үбеү.* ■ *Балдак һыуға суп итеп төшə лə китə* (Әкиəттəн).

**СУПАЙ** [1] *и.* Тауыҡ йəки бүтəн коштоң түбəһендəге өлпəйеп торған йөн. *Тауыҡ супайы. Супайлы кош.*

**СУПАЙ** [2] *и. диал.* Һупай.

**СУПАЙТЫУ** *к. диал.* Тупайтыу.

**СУПАЙЫУ** *к. диал.* Тупайыу. *Ҡояш .. ыландың арғы башына барып супайып ултырҙы ла байыуға əҙерлəнде.* Ә. Вəли.

**СУПАЛАҠ** *и. диал.* Һупай.

**СУПЕРФОСФА́Т** [*рус.*] *и.* Апатит, фосфорит кеүек тəбиғи фосфаттарҙан алынған фосфорлы ашлама.

**СУП-СУП, суп та суп** *окш.* Ҡабат-ҡабат суп [2] иткəн тауышты белдергəн һүҙ. *Ваҡ таш ишелеп оса түбəн. Иҙел унда [түбəндə] суп-суп итеп тотоп ята ташты, күрəм.* С. Ғəбиҙуллин. *Һуҙе бөткəс, егет ҡыҙҙы суп та суп үпкəн була.* Р. Ғəрипов.

**СУПТАЙЫУ** *к. диал.* Тупайыу.

**СУПТАР** *и.* Сүплəп, күтəреп һуғылған биҙəк; сүплəм. *Суптар һуғыу.*

**СУПТАРЛАУ** *к.* Киндер һуҡканда сүплəп, күтəреп биҙəк яһау. *Татлыбай .. биленə төрлө төҫтəге ептəн суптарлап һуғылған яҫы кəмəрен тартып, ҡаптырмаһын элəктереп куйҙы.* Ш. Шəһəр.

**СУПТАРЛЫ** *с.* Суптарлап һуғылған; суптар менəн биҙəлгəн. *Суптарлы кулмəк. Суптарлы таҫтамал. Суптарлы эскəтер. Суптарлы шаршау.* ■ *[Шəрəфи — ҡыҙҙарға:] Кизеле күлмəк, суптарлы ыштан, ҡайыулы сылғау, суклы бирсəткəлəрегеҙҙе беҙ киймəй, əллə кемдəр киймəҫ əле.* Н. Ҡəрип.

**СУПЫЛДАТЫУ** *к.* Суп-суп иттереү, суп-суп килтереү. *Супылдатып имеү. Супылдатып үбеү.* ■ *[Фəхри], ауыҙын супылдатып, яҫы ҡайыш дилбегə менəн урталағы аттың һыртына йомшаҡ ҡына ҡаҡҡылап алды.* Б. Бикбай. *[Әсəһен имеп торған] колондоң ауыҙ ситенə һөт күпереп сыҡкан, супылдатып һурған сакта күперектəре ҡыуыҡланып ярылып китə.* Ш. Шəһəр.

**СУПЫЛДАУ** *к.* Суп-суп итеү, суп-суп килеү. *Супылдап тамыу. Супылдығы сығыу.* ■ *Түбəнгə тəгəрəгəн бер нисə таш Еҙемгə барып төшөп, супылданы.* Ә. Вахитов. *Түшəмдəн иҙəндең тап уртаһына супылдап тамсылар тама.* С. Агиш.

**СУПЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **супылдау.** *Супылдашып һыу инеү.* ■ *Ваҡ ҡырсын супылдашып .. һыуға ҡойолдо.* Я. Хамматов. *Ҡыйыҡтан супылдашып тамсы тама.* Ф. Иҫəнғолов.

**СУПЫРЛАТЫУ** *к.* Супыр-супыр иттереү, супыр-супыр килтереү. *[Гөлзəйнəп:] Ҡайҙа, .. йылы һыу менəн супырлатып ҡына йыуындырып алайым.* И. Ғиззəтуллин.

**СУПЫРЛАУ** *к.* Супыр-супыр итеү, супыр-супыр килеү. *[Алексей менəн Лиза] ҡыҙмаса булып алған ирҙəрҙең ҡуйырыҡ һыуҙа супырлауҙарын күҙəтеп торҙолар.* З. Ғəлимов. *Иреткəнлектəн аяҡ аҫты супырлап ята.* И. Ғиззəтуллин.

**СУПЫРЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **супырлау.** *Ҙурыраҡ малайҙар .. тирлəп-бешеп һыуға төшə, супырлашып һыуҙа йөҙə.* Ғ. Амантай.

**СУПЫР-СУПЫР** *окш.* Ваҡ таш кеүек нəмə һыуға ҡойолғанда, ҡойоп, һирпеп һыуҙы болғатҡанда һ. б. ошондай хəлдə сыҡкан тауышты белдергəн һүҙ. *Супыр-супыр аш шапырыу. Супыр-супыр итеү. Супыр-супыр килеү. Супыр-супыр һыу кисеү.*

**СУР** [1] [*ғəр.*] *и. иҫк.* Һорнай, борғо. *Сур өрөү.* ■ *[Илсе] нəгрə орҙо, сур кеүек бер торбанан ен-бəрейҙəр сыҡты һикереп мөрйəнəн.* Ш. Бабич. *Сур тауышы күкте алды, бөтə ғəскəр тиҙ куҙғалды* (Бəйеттəн).

◆ **Сур өргəн ваҡыт** (*йəки* **көн**) дини хөрəфəтсə, ахыры заман алды. *Көҙгө елдең .. зыйлауы Һылыу ҡоркканың ҡарт күңеленə əллə ниндəй əхирəт тормошон, сур өргəн көндəрҙе һала ине.* Т. Йəнəби.

**СУР** [2] *и.* Ҡаты булып, ороланып торған, төплəнеп сыҡкан шеш. *Сурға сей ҡамыр ябалар.*

**СУР** [3] *и. иҫк.* Башҡа төшкəн ауыр ҡайғы, хəсрəт; бəлə. *Беҙ тормоштоң түбəн ҡатлауында сурлы булып һыктап тыуғанбыҙ.* Т. Йəнəби. *Һылап-һыйпап үҫкəн зифа буйым бəхетһеҙлек менəн хур булды, ата-бабам дəрəжəһе ғəзиз башкайыма сур булды* (Бəйеттəн).

**СУРА** *и. иҫк.* **1.** Кемгəлер буйһонған кеше; хеҙмəтсе. *[Танайгол:] Нишлəйем һуң, үлгем килмəй. Ййы сыҡкас, касырмын əле. Мырҙаголдоң туҫнағы ни ҙə, Либəшəү баярының сураһы ни — икеһе бер сама.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Хан, ғəскəр башлығы эргəһендəге батыр; нөгəр. *Аҙаматтар, суралар, аҫалда тыуған мырҙалар, кəңəшеңде ары һал, колағыңды бире һал* (Ҡобайырҙан).

**3.** *(баш хəреф менəн)* Ир-ат исеме.

**СУРАҒАЙ** *и.* Урта ҙурлыҡтағы суртан. *Ала сурағай. Ҡара сурағай.*

**СУРАЙТЫУ** *к.* **1.** Бүлтəйтеү, осло итеп ҡалҡытыу. *Сурайтып куйыу.*

**2.** *диал.* Һерəйтеү. *Сурайтып ултыртып куйыу.*

**СУРАЙЫУ** *к.* **1.** Осло булып йəки бүлтəйеп сығып тороу. *Сурайып тороу. Яраһы сурайып уңалған.* ■ *Ябыҡлыҡтан сикə һөйəктəре сурайып сыҡкан.* Һ. Дəүлəтшина.

**2.** *диал.* Һерəйеү. *Сурайып торған тау. Сурайып ултырған йорт.* ■ *Аҡланмаған мейес, өйҙө йəмһеҙлəп, түрҙə сурайып ултыра.* И. Ғиззəтуллин. *Алайғыр ташы .. əллə ҡайҙан уҡ сурайып күренеп тора.* Н. Мусин.

**СУРАЙЫШЫУ** *к. урт. кар.* **сурайыу** 1.

**СУРАШ** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**СУРГУЧ** [*рус.*] *и. кар.* **һурғыс** [2]. *Сургуч менəн мисəтлəү. // Сургуч мисəт.*

**СУРДОПЕДАГО́Г** [*рус.*] *и.* Сурдопедагогика буйынса белгес.

**СУРДОПЕДАГО́ГИКА** [*рус.* ‹ *лат.* + *гр.*] *и.* Дефектологияның һаңғырау һәм ҡолаҡҡа ҡаты балаларҙы тәрбиәләү, уҡытыу мәсьәләләрен өйрәнә торған тармағы.

**СУ́РИК** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* **1.** Составында ҡурғаш булған минерал.

**2.** Ҡыҙғылт көрән йәки ҡыҙғылт һары буяҡ. *Тимерле сурик. Сурик менән буялған ҡалай.*

**СУРҠАЙТЫУ** *к. диал.* Салшайтыу. *Итеген уксәһенә баҫып, сурҡайтып бөткән. Сурҡайған аяҡ кейеме.*

**СУРҠАҠ** *с. диал. кар.* **йүнһеҙ** 1.

**СУРРОГА́Т** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Ниҙелер алмаштырыу өсөн эшләнгән яһалма нәмә. *Аҙыҡ суррогаты. Алмас суррогаты. Кофе суррогаты.* ■ *— Унда бик ҡыйын, тиҙәр. Ашарға юҡ, суррогат менән генә аҡыҙландыралар икән, тиҙәр.* Д. Юлтый.

**СУРТ: сурт һыныу** ҡапыл киҫә һыныу. *Аяғы сурт һынған. Тәртәһе сурт һынған.* **Сурт һындырыу** 1) ҡапыл, киҫә һындырыу; 2) *күсм.* ҡыҫҡа тотоу, киҫкен хәл итеү.

**СУРТАН** *и.* Ялпаҡ башлы, оҙонса кәүҙәле йыртҡыс йылға балығы. *Ала суртан. Ҡара суртан. Суртан ҡармағы.* ■ *Суртан ҡарпый шаптыр итеп, йәйелдереп ҡулсалар.* Р. Ғарипов. *Ылаҫын ҡапыл суртанға әйләнеп, сабаҡты ҡабып йотам ғына тигәндә, тегенеһе һыу алып торған ҡыҙҙың силәгенә атылып инеп, алтын йөҙөк булды, ти* (Әкиәттән).

● *Суртан үҙе үлһә лә теше үлмәй.* Әйтем.

**СУРТАНЛЫҠ** *и.* Суртан ҡармағы. *Суртанлыҡ һалыу.*

**СУРТ-СУРАМАН** *и. һөйл.* Теләһе ниндәй нәмә.

**СУРЫТЫУ** *к.* Бәләкәй хәбәрҙе ҙур итеп, кәрәктән тыш арттырып, оҙонға һуҙыу. *[Мираҫ бүлеүҙе] .. оло бер хәбәр итеп, бишкә арттырып, сурытып, ауылдың осонан осона һөйләнеләр.* Ж. Кейекбаев. *Әсәйем: — Атаҡ, атаҡ, улйа тип ни, ашы — ашка, урыны — башка, ти. Ултыр, әйҙә, ултыр,— тип сурытып алып китте.* Н. Мусин.

**СУРЫУ** *к. диал.* Йүрмәү. *Сурып ямау.*

**СУСАЙТЫУ** *к.* Осло итеп ҡалҡытыу; суҡайтыу. *Сусайтып ҡуйыу.*

**СУСАЙЫУ** *к.* Ниндәйҙер яҫылыҡта өҫкә ҡалҡып, ослайып сығып тороу; суҡайыу. *Улар [малайҙар] кәмәне сусайып торған ташҡа бәйләне.* З. Биишева.

**СУСАЙЫШЫУ** *к. урт. кар.* **сусайыу.** *Сусайышып тороу.*

**СУСАҠ** *и.* **1.** Ниҙеңдер ослайып ҡалҡҡан урыны. *Тау сусағы.* ■ *Мин .. йәйәүләп таш сусағына мендем.* С. Кулибай.

**2.** Осло түбәле тау; суҡаҡ. *Таҡыя сусаҡ. // Сусаҡ таш.* ■ *Сусаҡ тауҙың ҡырласынан юлһыҙ тура тартығыҙ.* Һ. Дәүләтшина. *Таңға ҡарап, сусаҡ таш ҡаяла ҡанат ҡаға бөркөт саңҡылдап.* М. Тажи.

**СУСАҠЛАНЫУ** *к.* Сусаҡ рәүешенә килеү, сусаҡ булыу. *Сусаҡланып торған тау. Сусаҡланып сығып тороу.*

**СУСАНЛАУ** *к. һөйл.* Килешһеҙ булып һалыныу, һалбырау (кейем-һалымға, итәк-еңгә ҡарата).

**СУСҠА** *и.* **1.** Ҡыҫҡа аяҡлы, йомро томшоҡло, шырт йөнлө, айыры тояҡлы имеҙеүсе хайуан (ите, майы һәм тиреһе өсөн аҫрайҙар). *Аҡ сусҡа. Быуаҙ сусҡа. Сусҡа аҙбары. Сусҡа балаһы. Сусҡа ите. Сусҡа майы. Сусҡа көтөүе. Сусҡа фермаһы. Сусҡа шырты. Сусҡа аҫрау.* ■ *Бала-сағаның сыр-сыу килеүе, аттарҙың кешнәшеүе, .. сусҡаларҙың сырҡылдашыуы менән баҙар гөрләп тора.* Ғ. Дәүләтшин. *Ҡайҙандыр мырҡылдап, бер сусҡа килеп сыҡты.* Б. Мирзанов.

**2.** *һөйл.* Бысраҡ, әрпеш кешегә әйтелә. *[Рәхимә — Гөлйөҙөмгә:] Йәш килен, бынау ҡара сурнайыңды йыуындырып ал. .. Ана ҡалай бысранып, лаҡашып бөткән, сусҡа.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *һөйл.* Кәҙерҙе белмәй, тупаҫ һәм алама эш итә торған кешегә ҡарата әйтелә. *[Зилский:] Был сусҡа уҙ хәлен үҙе белмәй, әйе. Ауыҙын асһа, үпкәһе күренеп тора. Шул һыны менән .. миңә ҡаршы ҡул күтәрҙе.* Ғ. Дәүләтшин. *Эште бөлдөрҙө, сусҡа малай* Ж. Кейекбаев.

♦ **Сусҡанан бер ҡыл** теймәҫ ерҙән бер нәмә тейгәндә, алып ҡалырға кәрәк, тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Сәләхетдин:] Беҙ башҡа сыҡҡанда, атаҡайым, сусҡанан бер ҡыл тигәндәй, өтөк кенә булһа ла бер атын да биргән булды.* Д. Исламов.

**СУСҠАСЫ** *и.* Сусҡа ҡараусы.

**СУСҠАСЫЛЫҠ** *и.* Малсылыҡтың сусҡа аҫрау менән шөғөлләнгән тармағы. *Сусҡасылыҡ совхозы. Сусҡасылыҡ фермаһы.* ■ *Республикала сусҡасылыҡтың иң ныҡ алға киткән урыны — Ағиҙелдең урта ағымында урынлашҡан райондар.* М. Хисмәтов.

**СУСТАНЛАУ** *к. диал.* Останлау.

**СУСЫЛДАҠ** *с.* Ләпелдәп, күп һөйләүсән. *Борон заманда бер ир менән ҡатын йәшәгән. Ҡатын сусылдаҡ булыуы менән иренең тәкәтенә тейә икән* (Әкиәттән).

**СУСЫЛДАТЫУ** *к.* Һөйләндереү, күп һөйләнергә юл ҡуйыу.

**СУСЫЛДАУ** *к.* Ләпелдәп күп һөйләү. *Сусылдығы сығыу. Уның, сусылдап, һүҙе бөтмәҫ.*

**СУТАЯҠ** *и. диал. кар.* **сәкән** [1] 2. *Сутаяҡ менән туп һуғыу.*

**СУТЛАНЫУ** [1] *к. төш. кар.* **сутлау** [1]. *Сутланған бүрәнә.*

**СУТЛАНЫУ** [2] *к. диал. кар.* **сутлау** [2]. *Сутланған аҡса.*

**СУТЛАТЫУ** [1] *к. йөкм. кар.* **сутлау** [1]. *Өйҙө сутлатыу.*

**СУТЛАТЫУ** [2] *к. йөкм. кар.* **сутлау** [2]. *Аҡса сутлатыу.*

**СУТЛАУ** [1] *к.* Бура бүрәнәһен эс яҡтан тигеҙләп сабыу. *Өй һалыуҙың .. әллә ни хикмәте лә юҡ һымаҡ, бер ҡараһаң. Бура бурайһың да мүкләп өйәһең, сутлап шымартаһың.* Я. Вәлиев. *Энекәш, бик белгән кешеләрсә, бүрәнәләрҙе ҡарап сыҡты, .. бүрәнә сутлап торған Яхъяға кәңәш бирергә тотонды.* Ә. Вахитов.

● *Өй һалыуҙың ние бар: мүкләйһе лә сутлайһы.* Әйтем.

**СУТЛАУ** [2] *к. һөйл.* Һанау, иҫәпләү. *Ошо ерҙә утау утаған, көнөн билсән йыйып, төндәрендә ярыша-ярыша йондоҙ сутлаған [малайҙар беҙ].* С. Ғәбиҙуллин.

**СУТЛАУ** [3] *к. һөйл.* Ниҙелер әҙләп-әҙләп кенә йәшереп алып, нык кәметеү. *Балалар кәнфитте сутлап бөткән.*

**СУТЛАШЫУ** [1] *к. урт. ярҙамл. кар.* **сутлау** [1]. *Өй сутлашыу.*

**СУТЛАШЫУ** [2] *к. урт. ярҙамл. кар.* **сутлау** [2]. *Акса сутлашыу.*

**СУТ-СУТ, сут та сут** *окш.* Кош һайраған һ. б. тауышты белдергән һүҙ. *Сут-сут итеү.* ■ *Мең-мең телдә сут-сут һайрай коштар, ер йәшәртеп йылы яҙ тыуғас.* Р. Ғарипов. *Тамсы тама тып та тып, коштар һайрай сут та сут.* С. Кудаш.

**СУТЫЙ** *и. һөйл.* Бер гектар ерҙең йөҙҙән бер өлөшө; ар. *Баксам алты сутый.* ■ *[Нигмәтйән:] Үҙ баксаңды тултырып емеш-еләк ултырткаының етмәгән, тағы ла ун сутыйға якын колхоз еренә өңөп ингәнһең.* Ә. Зәйнуллин.

**СУТЫЛДАТЫУ** *к.* **1.** Сут-сут тауыш сығарыу, сут-сут итеү. *Әрәмәлә сутылдатып, коштар һайрай.* ■ *Соролдатып бүре олотоп, оран һалдырып, кейек кыуҙырып, сутылдатып, мең төрлө кош-корт һайраткан ялан үҙ миҙгелен юғалтты.* Т. Хәйбуллин. *Көмөш тауыштарын сутылдатып, һабан турғайҙары йырлайҙар.* Ғ. Мәсғүт.

**2.** *күсм.* Иркәләндереп, сусылдарға юл куйыу.

**СУТЫЛДАУ** *к.* **1.** Сут-сут итеү, сут-сут килеү. *Йәйҙең .. кәкүк сакырыуы ла, карсыға кыскырыуы ла, коштар сутылдауы ла донъя яңғыратыр бер мәле ине.* С. Кулибай. *Әле ергә, әле гөлгә куныл, турғай осоп йөрөй сутылдап.* К. Кинйәбулатова.

**2.** *күсм.* Йомшак кына итеп иркәләнеп, туктамай һөйләү. *[Иркәбикә:] Күпме әйткәнем бар улыма, түҙемле бул, яратыуыңды һиҙҙермә, тип. Юк һаман үҙенсә сутылдай: «гәүһәрем» дә, «алтыным», «һинән сибәр кыҙ булмаҫ» та «һин донъяла бер генә».* Ф. Рәхимғолова.

**СУТЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **сутылдау 1.** *Як-ягымда коштар сутылдашты, канат остарынан нур түгеп.* Ә. Таһирова.

**СУТЫР** *и. диал.* Суғырмак. *Агас сутыры. Юл сутыры.*

**СУТЫРЛАУ** *к.* Сутыр-сутыр итеү, сутыр-сутыр килеү. *Зөһрә апай ишектең келәһен элеп, йылы түшәгенә инеп сумғанса сутырланы.* «Ағиҙел», 1974, № 1.

**СУТЫРЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **сутырлау.**

**СУТЫРМАК** *и. диал.* Суғырмак. *Имән сутырмагы. Юл сутырмагы.*

**СУТЫР-СУТЫР** *окш.* Кыскырмай ғына туктауһыҙ бер яй менән һөйләгән, һөйләшкән тауышты белдергән һүҙ. *Сутыр-сутыр итеү. Сутыр-сутыр килеү.*

**СУФЛЁР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Уйнаған артиска ролдең һүҙҙәрен әйтеп ултырған кеше. *Суфлёр будкаһы.* ■ *[Совхоздыкылар] ысын артист һымак, суфлёрһыҙ уйнай.* Ф. Иҫәнғолов.

**СУ́ФФИКС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. грам.* Һүҙҙең тамыр менән ялғау араһында торған, башка бер тамырлы һүҙҙәргә карағанда икенсерәк мәғәнә биргән өлөшө. *Форма яһаусы суффикстар. Һүҙ яһаусы суффикстар.*

**СУФФИКСАЛЬ** [*рус.* суффиксальный] *с. грам.* Суффикска мөнәсәбәтле. *Һүҙҙең суффиксаль өлөшө. Һүҙъяһалыштың суффиксаль ысулы.*

**СУФФИКСА́ЦИЯ** [*рус.*] *и. грам.* Һүҙҙең йәки һүҙ формаларының суффикс ярҙамында яһалышы.

**СУФЫЙ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Донъянан ваз кисеп, аллаға, дингә мөкиббән киткән кеше. *Суфый булыу.* // *Суфый кеше. Суфый шәгир.* ■ *Атайым ярты ғүмерен дини мәктәптә үҙғарып, һәр нәмәлә аллаға ғына ышанып ята торған бер суфый .. ине.* Б. Ишемғол. *Бында кайҙа карама .. мөрит, суфый тулған булып, бөтә эштәрҙе намаҙға барып, тәсбих тартып кайтыуҙан ғибәрәт ине.* М. Ғафури.

**2.** *күсм.* Бик тыйнаклы, тәртипле кеше. *[Һылыу коркка:] Балам Миңлебай, арлы-бирле көн һурыккас, Ишдәүләт суфыйҙы сәйгә сакырып, бөгөнгө төшөмдө юратып алайымсы әле! Ул бик дөрөҫ юрай торғайны.* Т. Йәнәби.

**СУФЫЙЛАНЫУ** *к.* Суфый кеше, изге йән булып кыланыу. *[Дәүләткол — Рәхмәтуллаға:] Суфыйланма, һиңә лә файҙаһы тейәләр әле. Бер тинһеҙгә йөрөмәҫ инең.* Я. Вәлиев.

**СУФЫЙЛЫК** *и.* Суфый хәле, суфыйҙарға хас сифаттар. *[Хажи] заманына күрә аңлы булып, яңылык тарафдары, ишанлык һәм суфыйлыкка каршы ине.* М. Ғафури.

**СУФЫЙСЫЛЫК** *и.* Суфыйлыкка нигеҙләнгән дини идеалистик караш. *Суфыйсылыктың асык күренеп торған үҙенсәлекле сифаттары: ортодоксаль исламдың катмарлы ритуалын кире кағыу, аллаға табыныусыларҙы аскетлыкка, мистиклыкка өндәү, ижтимағи тормоштан бөтөнләй ваз кисеп йәшәргә сакырыу.* Ә. Харисов.

**СУШИ́ЛКА** [*рус.*] *и. кар.* **киптергес** [1].

**СҮБӘК** [1] *и.* Етенде, киндерҙе талкып тарағандан һуң калған кыҫка сүс; каба төбө. *Етен сүбәге. Киндер сүбәге. Сүбәк иләү.* ■ *Майлы кулын сүбәккә һөртә-һөртә Камил килде, .. Азаматов менән кул биреп иҫәнләште.* Ә. Вәли. *Ауырға торған капкаларҙан сүбәктәре сыккан бүрек кейгән бер нисә кеше .. күренде.* М. Ғафури. *Вәли сүбәк һалып һырыған кырк ямаулы иҫке юрғаны аҫтынан башын калкытып караны.* С. Ханов.

◆ **Сүбәк бороу** *диал. кар.* **сүбәк сәйнәү. Сүбәккә әйләнеү** нык таушалыу, туҙыу. *Башкорт һуғышсылары үҙ газеталарын .. хатта алғы һыҙыкта атакаға барғанда ла күтәреп ала, кулдан кулға сүбәккә әйләнгәнсе йөрөтөп укыйҙар.* Ф. Иҫәнғолов. **Сүбәк сәйнәү** бер нәмәне күп һөйләү. *[Алтынбикә:] Тейешле сәғәттән артык эшләү законда юк ул. Әйтмәйһегеҙме ни? [Сабир:] Йыйылыш һайын [әйтәбеҙ]. Бушка сүбәк сәйнәүҙән ни файҙа.* Ғ. Байбурин.

● *Сүбәк сәйнәп май сыкмай.* Әйтем.

**СҮБӘК** [2] *и.* Үксәһеҙ еңел аяк кейеме. *Катын йомшак сүбәге менән тауышһыҙ ғына атлап, урынына кире килде.* Ф. Иҫәнғолов.

**СҮБӘКЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Нык таушалдырыу, туҙҙырыу; сүбәккә [1] әйләндереү. *Күмәк кеше тапап, балаҫты сүбәкләндереп бөткәндәр.*

**СҮБӘКЛӘНЕҮ** *к.* Нык таушалыу, туҙыу; сүбәк кеүек булыу.

**СҮБӘКЛӘҮ** *к. кар.* **сүбәкләндереү.**

**СҮГЕНЕКЛӘҮ** *к. диал.* Йөгөнөкләү. *Бөтә халыҡ алдында сүгенеклэп ултырып, үкһеп иланым.* Й. Солтанов.

**СҮГЕҮ** (сүк*е*) *к.* **1.** Аяҡ быуындарын бөгөп, буйҙы түбәнәйтеү, сүкәйеү. *Ергә сүгеү. Сүгеп ултырыу.* ■ *Байназар, ҡурҡыуҙан бигерәк, быҙауҙарҙы ҡыҙғаныпv үкереп илап ебәрҙе һәм башын баҫып ергә сүкте.* Б. Бикбай. *Минең улым да ҡом өҫтөнә сүгеп, .. шаҡмаҡтан өй яһарға тотондо.* Р. Низамов.

**2.** Бейеклеккә, буйға кәмеү; түбәнәйеү. *Зөлфиә берсә бәләкәс кенә булып, сүгеп киткән, берсә .. ҡутәрелеп киткәндәй була.* С. Агиш.— *Шулай була шул ул: йәштәр үҫә, ҡарттар сүгә.* һ. Дәүләтшина.

◆ **Теҙ сүгеү** 1) тубыҡланыу. *Ут янына шахтёрҙар теҙ сүгеп ултырған.* Ш. Шәһәр. *Шунда уҡ теҙ сүктем. Ҡуйылған .. китаптарҙы, ҡулдарым ҡалтыраған хәлдә, күҙҙән кисерҙем.* М. Ғафури; 2) баш эйеү, буйһоноу. *Ауырлыҡтар алдында теҙ сүкмәү.* ■ *[Арбай — Көбәккә:] Ярлыларҙы яҡлап мин яу саптым, ә һин, һатлыҡ, батшаға теҙ сүгеп, беҙгә ҡаршы ҡорал күтәрҙең.* Б. Бикбай. *Баш эймәгән горур халҡым, теҙ сүгеп йәшәмәгән.* М. Кәрим.

**СҮГӘЛӘҮ** *к.* Аяҡ быуындарын бөгөп, буйҙы түбәнәйтеү; сүгеү, сүкәйеү. *Ергә сүгәләү. Сүгәләп ултырыу.* ■ *Зәкиә ҡул һелтәне лә ҡойма артына кире сүгәләне.* Ф. Иҫәнғолов.

**СҮГӘТӘ** *и. диал.* Сеүәтә. *Сәмсиә инәй .. оло сүгәтә менән Мәсәгүтовка ҡымыҙ килтереп тотторҙо.* Р. Солтангәрәев. *Хатта бер сүгәтә оном юҡ.* Б. Вәлит.

**СҮК** [1] *и.* Ҡыҙҙырып, киләлә төйгән тары ҡурмасы (һөт йәки ҡаймаҡ ҡушып ашайҙар). *Иртә менән ашалған бер каса тары сүге [Арғанбайҙың] көсөн оҙаҡ һаҡлай алманы.* С. Агиш.

**СҮК** [2], **сү-үк** *өнд.* Һыйыр эсергәндә әйтелә торған һүҙ. *[Ялсылар] байҙың малына сү-үк, сү-үк тип, ҡыҫтап-ҡыҫтап һыу эсерә.* А. Таһиров.

**СҮКЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **сүкеү** 1, 2. *Сүкелгән салғы.* ■ *Тимерҙәр сүкелә, оҫҡондар оса.* Б. Бикбай.

**СҮКЕР** *и. һөйл.* Сабылған үлән төбө. *Сүкерҙе ҡаплап ҡурпы сыға.* ■ *Тешле салғы менән үләндең төбөнән шыртылдата ҡырҡтырып сығалар. Ҡыҫҡа ғына сүкере тороп ҡала.* Ғ. Ишбулатов.

**СҮКЕРЕҮ** *к. диал.* Һуғыу, һуғып иҫәңгерәтеү. *Сүкерә һуғыу. Башына сүкереү.*

**СҮКЕТЕҮ** *к.* **1.** *йөкм. ҡар.* **сүкеү.** *Салғы сүкетеү. Таш сүкетеү. Тимер сүкетеү.* ■ *[Ҡотлозаман — Фәрхетдингә:] Теге мәлгүнде [комһоҙ йыртҡысты] сүкетә алдыңмы, юҡмы?* Ғ. Вәлиев.

**2.** Ваҡ, текә баҫып юртыу (атҡа ҡарата). *Ерәнсәй .. бойҙай баҫыуы буйлап сүкетте.* Т. Килмөхәмәтов. *Ат еңел юрта, хатта сүкетергә, сабып китергә әҙер.* Ғ. Хөсәйенов. / Шул рәүешле юрттырыу. *Имаметдин .. үҙе менән ҡырандаҫҡа Мәкәр купең улын ҡатар ултыртып, саптарҙы ҡыя сүкетеп, Сәргәйгә инеп бара ине.* һ. Дәүләтшина.

**3.** *күсм.* Оҫта баҫып бейеү. *[Әхәт] фуражкаһын кемгәлер тотторҙо ла .. ҡарабайға сүкетә башланы.* Д. Исламов.

**4.** *күсм.* Бик ныҡ, ҡаты бәрелеү. *Таһир олатай, әбейе һүҙҙәренән ауырһыныпv тамағын ҡырҙы: — Ниңә улай сүкетеп әйтәһең, әбей? Баланың күңелен уйларға кәрәк.* Й. Солтанов.

**СҮКЕҮ** *к.* **1.** Ниндәйҙер форма биреү өсөн металды сүкеш менән һуғып йәнсеү. / Сүкеш менән һуғып, металдан нимәлер яһау. *Балдаҡ сүкеү.* ■ *Элек ул [Айҙар] уҡ башағы ғына сүкей ине, хәҙер самопалдар яһай.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** Сүкеш менән һуғып, салғының йөҙөн йоҡартыу; тапау. *Иртәгә бесәнгә төшәһе бар, салғыны сүкеп ҡуйырға кәрәк.* З. Биишева. *Курше бабай йәпләп салғы сүкей, һандал тауыштары яғымлы. Сүкей-сүкей йәнсеп бөткән салғың, ошо салғың егет сағыңдаҡ.* М. Әйүпов.

**3.** Сүкеш йәки башҡа ҡорал менән ҡаты нәмәне соҡоу; соҡоп ырыу. *Ҡәбер ташы сүкеү.* ■ *[Шафиҡ] тоҡсайындағы таш сүкей торған тимерҙәрен ала ла әлеге ташты сүкей башлай. Ҡыҙ һынын хәтерләткән таш сүкегән һайын йәнләнә, юнған һайын терелә бара.* Ә. Вахитов.

**4.** Нимәгәлер берәй нәмәнең осо менән һуғыу, туҡылдатыу. *[Ағай] папиросын алды һәм уны .. көмөш портсигарының ҡапҡасына оҙаҡ сүкеп торҙо.* С. Агиш. *Ғәли майлы ҡулы менән берсә елкәһен тырнап, берсә үҙенә үҙе асыуланып, маңлайын сүкеп, .. бысранып бөткәйне.* Ә. Вәли.

**5.** *күсм.* Үлтерә һуғыу, үлтереү.— *Сабыр итәм тип, ырҙын артына алып сығып, сүкеп киткәндәрен көтөп ятабыҙмы?* В. Исхаҡов.

**СҮКЕШ** *и.* Ҡағыу, сүкеү, йәнсеү, турайтыу һ. б. өсөн ҡулланылған арҡыры ағас йәки тимер башлы, төҙ һаплы ҡорал. *Итексе сүкеше. Салғы сүкеше. Геолог сүкеше.* ■ *Кейем элгестәре ҡағып торған Тайморзин ҡулындағы сүкешен иҙәнгә ырғытты.* М. Тажи. *Ҡайын төбөндә салғы сүкегән түңәрәк һаҡаллы ҡарт сүкешен ситкә һалды ла Хисмәтулла эргәһенә килде.* Я. Хамматов.

**СҮКЕШБАЛЫҠ** *и.* Акулалар ғаиләһенә ҡараған, башы сүкешкә оҡшап торған йыртҡыс диңгеҙ балығы.

**СҮКЕШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **сүкеү** 1—3. *Салғы сүкешеү. Таш сүкешеү.*

**СҮКЕШСЕ** *и.* Сүкеш менән эшләгән эшсе. *Рафиҡ ағай үҙенең сүкешсеһенә .. команда бирҙе.* Ш. Шәһәр.

**СҮКТЕРЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **сүгеү.** *Ҡаҙаҡ ыңғырашты*rып дөйәләрен сүктерҙе.* А. Таһиров. *Шунда ғифритте аҡыртып сүктереп, .. төштө иблис ергә аҡрын баш әйҙе.* Ш. Бабич.

**СҮКӘЙЕҮ** *к.* **1.** Аяҡ быуындарын бөгөп, осаны ергә тейҙермәй ике табанда йәки аяҡ осонда ултырыу. *Зыяраттан сыҡҡас, Ғәйзулла ауыл яғына ҡарай ҡырҡ аҙым атланы ла сүкәйеп ултырып, ниҙер тыңларға тотонлдо.* Я. Хамматов. *Ә Гөлдәр уның һайын бейей, .. һикереп-һикереп ала, ултырып, сүкәйеп тә китә.* К. Кинйәбулатова.

**2.** Арт һанды ергә ҡуйыу (эт, бүрегә ҡарата). *Кәзә оямының ауыҙында ғына дәү бер бүре сүкәйеп ултыра.* С. Кулибай. *Йомран, ирләндәр ҙә был яҡта [ялан яҡтарында] күберәк күренә, юл буйҙарында сүкәйеп ултырып, һыҙғырып тороп ҡалалар.* С. Агиш.

**СҮКӘЙЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **сүкәйеү**. *Сүкәйешеп бейеү. Ҡара-ҡаршы сүкәйешеп ултырыу. Юлдың буйынан-буйына йомрандар сүкәйешкән.*

**СҮКӘЙЛӘҮ** *к. диал.* Сүкәйеү. *Сүкәйләп ултырыу.* ■ *Бер тәпәшәк өй эргәһендә бер әү сүкәйләпме, .. нимәгәләр ултырыпмы тора икән.* А. Таһиров.

**СҮКӘЙТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **сүкәйеү**. *Сүкәйтеп ултыртыу.*

**СҮКӘКЛӘҮ** *к.* Сүкәйеп хәрәкәт итеү.

**СҮКӘМӘ** *и. диал. кар.* **боламыҡ** 1.

**СҮЛ** *и.* Бик ҡоролоҡло, үҫемлеккә бик ярлы, ҡомло киң дала. *Әлмәңләп йөрөгән ас сүл бүреләре килеп сыға, тотош өйөрө менән ерәндең боттарына йәбешә.* Б. Бикбай.

◆ **Сүл боросо** *бот.* ике өлөшләләр ғаиләһенә ҡараған йыуан итләс һабаҡлы, һутлы япраҡлы, ҡыҙыл йәки аҡ баш сәскәле үҫемлек.

**СҮЛЛЕК** [1] *и.* Сүл булған ер. *Тормош ҡалҡа сүллек, ҡомда ла.* М. Тажи.

**СҮЛЛЕК** [2] *и. диал.* Сикүшкә. *[Ғибаҙулла:] Аш алдынан ғына төшөрөрмөн, тип бер сүллекте лә алып ҡайтып ҡуйҙым.* Д. Исламов.

**СҮЛМӘК** *и.* **1.** Һөт, ҡатыҡ һ. б. һалыр өсөн суйын йәки балсыҡтан яндырып яһалған, төпкә табан тарая барған йомро сөм һауыт. *Ҡом сүлмәк.* ■ *Ғази урлап килтерелгән сүлмәктән ҡаймаҡ ҡайырып алды.* Ф. Иҫәнғолов. *Суйын сүлмәк, тар котелок, бешә һалдат аштары* (Халыҡ йырынан). *Ярма бурткән дә бурткән, ти,.. ярма бурткәс, сүлмәк тулып киткән, ти* (Әкиәттән).

**2.** Балалар уйыны (бер-бер артлы теҙелеп ултыралар: алда бабай, шунан әбей һәм балалары; сүлмәк һораусы килеп, бабай, сүлмәк бир әле, ти, иң арттағы балаһын тарта башлай; ул ысҡынмаҫҡа тырыша; уйын сүлмәктәрҙе алып китеп бөткәнсе дауам итә).

◆ **Йоҡо сүлмәге** *кар.* **йоҡо**. *Төшкә саклы йоҡлап тик ята. Йоҡо сүлмәге ул Миңлеғата.* С. Муллабаев. **Сүлмәк ҡаҙан** *кар.* **ҡаҙан** 1.

● *Май сүлмәге майҙа аунай, көл сүлмәге көлдә аунай.* Әйтем. *Сүлмәк сүлмәккә, йөҙөң ҡара, тигән.* Әйтем.

**СҮЛТӘЙЕҮ** *к. диал.* Бултәйеү. *Ирене сүлтәйеп, асыуланырға ғына тора.*

**СҮМЕС** *и.* **1.** Аш-һыу һоҫа торған тотҡалы һауыт. *Тимер сүмес. Ағас сүмес.* ■ *Емеш бер сүмес һалҡын һыуҙы төп күтәрә һемереп эсте.* З. Биишева. *Икешәр йөҙ күнәк һыу һыя торған шандар ҙа, .. ҡаҙандар ҙа, бер һирпеп алғанда бер нисә күнәк һөт һоҫа торған сүместәр ҙә .. тик тора.* И. Насыри. **Сүместәй** *йәки* **сүмес кеүек** нәмәнең самаһыҙ ҙур икәнен күрһәтеү өсөн әйтелә. *Сүмес күҙ. Сүместәй танау.* ■ *[Әнүәр:] Нурулла ғына тырнаҡ менән сыртһәң дә сүместәй йоҙроғон беҙҙең арҡала бейетергә тора.* И. Абдуллин.

**2.** *тех.* Сумырып нимәнелер һоҫоп ала йәки эсенә нимәлер ҡоя торған һауыт рәүешендәге төрлө ҡорал. *Экскаватор сүмесе.* ■ *Ҡыҙҙың етеҙ ҡулдарына буйһоноп, «Ковровец»тың сүмесе үткер тырнаҡтарын Ыҡ йылғаһы быуаттар буйы йыйған ком ҡатыш суйырташ ҡатламына батырҙы.* Д. Исламов.

**3.** *диал. кар.* **ижау** 1.

◆ **Селтәрле сүмес** ниҙелер һөҙөү йәки иҙеү өсөн хеҙмәт иткән төбө ваҡ-ваҡ тишекле сөм һауыт.

● *Сүлмәккә ни һалһаң, сүмескә шул сыға.* Мәҡәл.

**СҮМЕСБАШ** *и.* Ер-һыу хайуандары класына ҡараған йөҙгөс ҡойроҡло тәлмәрйен балаһы. *Сүмесбаш балыҡ селбәрәһенә оҡшай.* ■ *Әрмәнде күл халҡына яман [маҡтанды]: «Йәмәғәт, улыма иғтибар итегеҙ, төҫө-һыны тап гигант кит!» Улы көнө-төнө үҫте лә үҫте, тик сүмесбаш булды бары әрмәнде.* С. Иманғолов.

**СҮМЕСЛӘП** *р.* Сүмес менән алыу. *Гөлйөҙөм .. кар һыуын сүмесләп-сүмесләп аҡ күнәктәргә тултыра.* Һ. Дәүләтшина.

**СҮМӘКСЕТЕҮ** *к.* Баш түбән ебәреү, түкмәстереү. *[Һаксының] ике аҙым алға ынтылыуы булды, шул секундта уның арт яғынан шыҡ иттереп елкәһенә бирелгән приклад уны сүмәксетеп ергә ҡолатты.* Һ. Дәүләтшина.

**СҮМӘКСЕҮ** *к.* Баш түбән китеү. *Сүмәксеп барып төшөү.* ■ *Хәмдиә сүмәксеп барып ҡарға тәгәрәне лә [Әхмәҙиғә] асыу менән: — Ни эшләйһең һин, ен! — тине.* Һ. Дәүләтшина.

**СҮМӘКӘЙ** *р. диал.* Мөлдөрәмә. *Сүмәкәй итеп ҡойоу.* ■ *[Гөлсөм:] Шатлығым сүмәкәй булды.* И. Абдуллин. *Аяҡсылар, туҫтағығыҙ сүмәкәй тулған булһын.* М. Кәрим.

**СҮМӘЛӘ** *и.* **1.** Бер арбалыҡ көлтә өйөмө. *Артабанырак, көлтә сүмәләләре сыбарлаған тирәлә, бер нисә кеше бил яҙмай иген ура.* Н. Мусин. *«Быны, Гөлнур,— тинем,— бынау ашлыҡ — дүрт тағаҡлап ҡуйған сүмәлә».* Б. Вәлит.

**2.** *диал. кар.* **кубә** [1]. *Бесән өҫтө. Артта бер нисә сүмәлә күренә.* Ҡ. Даян. *Сүмәлә тарттырғанда ат башында мин йөрөй инем.* М. Ғафури.

◆ **Сүп өҫтөнә сүмәлә** бәлә өҫтөнә бәлә килгәндә әйтелә. *Сүп өҫтөнә сүмәлә тигәндәй, .. кулдәгемде йыртып ҡуйҙым.* М. Тажи. *Сүп өҫтөнә сүмәлә тигәндәй, былар [Ғәйшәләр] йәшәгән төбәктә ҡаты аслыҡ башлана.* М. Ғафури. **Сүптән сүмәлә өйөү** *йәки* **сүпте сүмәлә итеү** эҙ ғәйепте арттырыу. *Ишетигән кемдәрҙеңдер сүпте сүмәлә итергә .. әҙер тороуына ҡарап юғала торған кешеләрҙән булмаһа ла, был [мулланы туҡмағандар тигән] хәбәргә аптырамай булдыра алманы.* З. Биишева.

**СҮМӘЛӘЛӘҮ** *к.* Сүмәләгә (1 мәғ.) өйөү. *Көлтәне сүмәләләү.*

**СҮМӘШЕҮ** *к. диал.* Сүкәйеү. *Атлылар .. юлсыларҙың һөйләшкәнен тыңлар өсөн ут янына сүмәшеп ултырҙылар.* Ш. Шәһәр.

**СҮҢКӘЙЕҮ** *к. диал. кар.* **ауышыу** 1. *Өйө бер яҡҡа сүңкәйгән.*

**СҮП** [1] *и.* **1.** Ниҙеңдер күркен ебәргән кәрәкһеҙ йәки ташландыҡ ваҡ-төйәк нәмә. *Сүп йыйыу. Сүп түлтырыу. Сүп корзинкаһы. Сүп күнәге.* ■ *Беҙ өсәүләп кураны һеперҙек. Унда хәҙер бер генә сүп тә юҡ.* М. Кәрим. *[Өйҙөң] стеналары бысрак, иҙәндәре сүп.* Д. Юлтый.

**2.** Осоп, туҙып йөрөгән ваҡ ҡына бер киҫәк, остоҡ. *Малайҙар яр буйында ут тоҡандырып .. ашарға ултырғанда, береһенең күҙенә сүп төштө.* Я. Хамматов.

**3.** *һөйл.* Тәнгә ҡаҙалған ваҡ нәмә; шырпы. *Баланың аяғына сүп ингән.*

**4.** *һөйл.* Бәләкәй генә нәҙек сыбыҡ. *[Әбей] ҡыҙыл алдырҙың ситен бармағы менән һыпырып, өҫтөнә бисмилла итеп арҡыры сүп һалды.* Ғ. Дәүләтшин.

**5.** *кусм.* Бер кемгә кәрәкмәгән, иҫәпкә алынмаған, һанға һуғылмаған кеше йәки нәмә. *Тормош сүбе. Сүпкә һанау. // Сүп кеше. Сүп нәмә.* ■ *Хәтерләйҙер, бәлки, үткәндәрен, таҙа сағын. .. Ә ул аунай бөгөн яңы урамда, шатлығынан яҙған йәнле сүп.* Ғ. Хәйри. *[Аҡыл һатыусылар араһына] барып ҡыҫылһаң һин, һинең һүҙең улар өсөн сүп кенә.* С. Агиш.

**6.** *кусм.* Берниндәй ҡыйынлыҡ тыуҙырмаған, еңел башҡарыла торған нәмә. *[Шәүәли:] Аҡселәнде яңы шишмә булып сыҡҡан ерәнән быуыу — сүп, ә .. ағып киткән һайын .. быуырға тешең үтмәҫ.* Б. Бикбай. *[Тимергәле — Ныяҙғолға:] Аҡса ғына кәрәк. Һиңә ул сүп тә түгел бит.* Һ. Дәүләтшина. *[Зөлхизә — Колҡайға:] Була ул, апай, [ҡурай тарта] белгән кешегә сүп тә түгел ул. Уйнайбыҙ уны.* Н. Иҙелбай.

**7.** *диал. ҡар.* **сүбәк** [1]. *Етен сүбе. Киндер сүбе.*

◆ **[Башына] сүп һындырыу** кешенең үҙ ғәҙәтендә булмаған йәки унан көтөлмәгән бер яҡшы эш эшләгән ваҡытында әйтелә. *[Алмаҡай:] Ҡуй, еңгә, Айбикә еңгәмдең килеүенә һоҡланып, күҙ тейҙереп ҡуйырһың. Ҡыу сүп һындырып ҡына һөйләш.* Һ. Дәүләтшина. **Күҙгә сүп һалыу** насарлыҡ ҡылыу. *Байҙың күҙенә начальствоның күбеһе сүп һалырға баҙнат итмәй.* Һ. Дәүләтшина. **Сүп ҡайырмай ятыу** *ҡар.* **ҡайырыу. Сүп осороу** ғәйепте йәшереп, ғәйепһеҙ итеп маташыу. **Сүп өйөү** ғәйеп, яла яғыу. *[Сәғиҙә:] Иреңә бәлә ягырға, юҡ ғәйепте бар итеп, уның өҫтөнә сүп өйөргә уйланыңмы?* М. Тажи. **Сүп өҫтөнә сүмәлә** *ҡар.* **сүмәлә.**

**СҮП** [2] *и.*, **сүп үләне** Баҫыуҙа иген һ. б. араһында үҫкән төрлө үлән; ҡый. *Игенде сүп алған. Июнь айында сүп үләне бик шәп үҫә. Картуф баҡсаһын сүп баҫҡан, сүп-сарын утарға кәрәк.* Ж. Кейекбаев. *Сәскән ашлыҡтарында сүп заты булманы.* Ә. Вәли.

**СҮП** [3] *и. диал.* Сыуын. *Сүбен һалыу.*

**СҮПЛЕ** [1] *с.* Сүп [1] (1 мәғ.) тулып ятҡан, сүбе күп. *Сүпле булмә. Сүпле ишек алды. Сүпле урам.*

**СҮПЛЕ** [2] *с.* Сүп [2] күп булып үҫкән; ҡыйлы. *Арыш емерелеп үҫкән, .. әммә иген сүплерәк ине.* М. Тажи.

**СҮПЛЕК** *и.* Сүп [1] (1 мәғ.) түккән урын. *Емеш .. уҡты өс-дүрткә һындырҙы ла, кәртә яғына, сүплеккә ырғытты.* З. Биишева. *[Үҫмер] бер көн муйынындағы һары кресты сүплеккә илтеп ташлаған.* М. Хәй.

**СҮПЛЕЛЕК** *и.* Игендәге, иген араһындағы сүп [2] миҡдары. *Баҫыуҙың сүплелеге. Игендең сүплелеге.*

**СҮПЛӘМ** [1] *с.* Берәмләп, сүпләп кенә йыйылған йәки йыйырлыҡ. *Бында еләк сүпләм генә.* ■ *[Әптерәй:] Әйе, [игене] һинең менән минеке кеүек сүпләм генә түгел, ә налогы, ҡурҡма, беҙгә уларҙыҡынан биш өлөш артыҡ төшөр әле.* Һ. Дәүләтшина.

**СҮПЛӘМ** [2] *и.* Киндер һуҡҡанда, буйлыҡты күтәреп яһаған биҙәк; суптар. *Сүпләм һуғыу. Сүпләмле балаҫ. Сүпләмле күлдәк.* ■ *Миңлегәли менән Фәтих .. парлы мунсанан һуң сүпләмле ашъяулыҡ йәйеп, ҡунаҡса йыйыштырылған өҫтәл артында .. аш тәме өсөн аҙырак һөйәк йомшартып алды.* Х. Ғиләжев. **Сүпләм таҡтаһы** (*йәки* **ҡылысы**) *диал.* сүпләүес.

**СҮПЛӘНЕҮ** [1] *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **сүпләү** [1] 1. *Сүпләнгән бүлмә. Сүпләнгән ишек алды. Сүпләнгән урам.*

**2.** *кусм.* Кәрәкмәгән буш нәмә менән тулыу, сыбарланыу. *Сит тел терминдары менән сүпләнеү.* ■ *Башҡорт поэзияһының шул тиклем сүпләнеүен, риториканың, трафареттың йыр өлкәһендә шулай сәскә атыуын аңлатыуы ла ауыр.* Н. Нәжми.

**СҮПЛӘНЕҮ** [2] *ҡ. төш. ҡар.* **сүпләү** [2]. *Сүпләнгән ашлыҡ. Көтөүлектәр мал ашамай торған үлән менән сүпләнә.*

**СҮПЛӘНЕҮ** [3] *ҡ.* Үҙ алдына эҙләнеп ниҙер сүпләү [3] (1 мәғ.). *Торналар йүгерә-йүгерә сүпләнеп, ашап йөрөй.* И. Ғиззәтуллин. *Өй урынында .. алабуталар араһында бер-ике кәзә генә ылаҡтарын әйәртеп, сүпләнеп йөрөй ине.* Һ. Дәүләтшина.

**СҮПЛӘТЕҮ** [1] *ҡ. йөкм. ҡар.* **сүпләү** [1] 1. *Иҙәнде сүпләтеү.*

**СҮПЛӘТЕҮ** [2] *ҡ. йөкм. ҡар.* **сүпләү** [3] 2. *Еләк сүпләтеү.*

**СҮПЛӘҮ** [1] *ҡ.* **1.** Сүп [1] (1 мәғ.) төшөрөп, сүп ташлап, сүпле итеү. *Иҙәнде сүпләү. Ишек алдын сүпләү.* ■ *Һөнәрсе .. «ауылдаштарҙың йорттарын эшкинмәгән көршәктәр менән сүпләүҙән туҡтатырмын!» — тип кәһәт иткән.* З. Биишева.

**2.** *кусм.* Кәрәкмәгән башҡа сит нәмә ҡатнаштырыу. *Телде сүпләү.*

**СҮПЛӘҮ** [2] *ҡ.* Сүп [2] үҫтереп, сүпле итеү. *Баҡса сүпләү. Баҫыуҙы сүпләү.*

**СҮПЛӘҮ** [3] *ҡ.* **1.** Берәм-берәм алыу, берәмләп йыйыу. *Башаҡ сүпләү. Емеш сүпләү. Ем сүпләү. Ерҙән сүпләү. Картуф сүпләү.* ■ *Сейәбикә кисә көндөң буйына тигәндәй Сейәле ҡыр буйында ҡыр емешен сүпләп арманһыҙ булып арып ҡайтты.* Т. Хәйбуллин. *Завцех килеп, сәселгән хәрефтәргә ҡараны. Сәлим ағай ҡыҙарып-бүртеп, .. бик аҡрын хәрәкәт менән хәрефтәрҙе сүпләй ине.* Х. Мохтар.

**2.** Киндер һуҡҡанда, биҙәк һалыу өсөн буйлыҡ ептәрҙе һанап айырыу; суптарлау. *Сүпләп һуғыу. Сүпләү ҡалағы.*

**3.** *кусм.* Аранан һайлап алыу. *Көй сүпләү.* ■ *Йәш телселәребеҙҙән мәрхүм Мисбах Мортов «Башҡорт һүҙлеге» өҫтөндә эшләгәндә, журналдарҙа баҫылған башҡорт фольклоры материалдарынан сүпләп меңгә яҡын яңы һүҙ яҙып алды.* Ғ. Амантай.

**4.** *кусм.* Берәм-берәм тотоу, берәмләп һайлау, алыу. *[Сағанбай:] Пугачёвтың яуы баҫтырылғас, уның яҡындарын сүпләй башланылар.* Ҡ. Даян. *Боецтар дошманды сүпләп атыу буйынса үҙҙәренең иҫәбен астылар.* Ә. Ихсан.

◆ **Тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫ** (*йәки* **бөтөрлөк түгел**) *ҡар.* **тауыҡ.**

**СҮПЛӘҮЕС** *и.* Сүпләп[3] (2 мәғ.) һуҡҡанда бүйлыҡ ептәрҙе айыра торған шыма йоҡа таҡта.

**СҮПЛӘШЕҮ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **сүпләү**[3].

**СҮПРӘ** *и.* Ҡамыр, бал һ. б. әсетә торған матдә; әсетке. *Сүпрә бәшмәге. Сүпрә һалыу. Сүпрә яһау.*

**СҮПРӘЛЕ** *с.* Сүпрә һалынған, сүпрә ҡушылған. *Сүпрәле ҡамыр.*

**СҮПРӘЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **сүпрәләү**. *Сүпрәләнгән бесән.*

**СҮПРӘЛӘҮ** *ҡ.* Сүпрәле итеү, сүпрә ҡушыу, һалыу. *Шофёр .. сүпрәләп бешергән бойҙай күмәсен һындырып алды.* Р. Ғабдрахманов. *Хәҙер «Байрамғол» совхозының бөтә фермаларында ла малдарға һыуҙы йылытып эсереү, һаламды сүпрәләп ашатыу .. ойошторолған.* Р. Шәкүр.

**СҮП-САР** [1] *и. йыйн.* **1.** Теләһә ниндәй сүп[1] (1 мәғ.). *Сүп-сар араһы. Сүп-сарҙан таҙартыу. Сүп-сар менән тултырыу.* ■ *Сәгиҙә .. ҡойма буйындағы сүп-сарҙы һеперергә тотондо.* М. Тажи. *Унда [ер өҫтөндә] ятҡан кәүҙәләр, [гүйә] тормоштан сығарып ырғытылған кәрәкһеҙ киҫәктәр. Ташҡын менән һеперелеп ташланған сүп-сар.* Д. Юлтый. *Кино ҡарағанда .. көнбағыш ярып, бөтә аяҡ аҫтын малай сүп-сар менән тултырған.* Т. Арслан.

**2.** *күсм.* Теләһә ниндәй файҙаһыҙ ваҡ-төйәк, буш нәмә. *Сүп-сар менән булышыу.* ■ *Эй, ауыл! Беҙ күрәбеҙ: һиндә сүп-сар, һиндә иҫке арттаҡлыҡ.* Т. Йәнәби. *Һөймәйем мин, ниндәй күркәм булһа ла, үҙ шиғырым, сөнки һөймәҫкә хаҡым бар — һәммәһе үҙ сүп-сарым.* Ш. Бабич.

**СҮП-САР** [2] *и. йыйн.* Баҡса, баҫыуҙы баҫып алған төрлө сүп[2]. *Картуф баҡсаһын сүп баҫҡан, баҡсалағы сүп-сарҙы утарға кәрәк* Ж. Кейекбаев. *Йомшарта ағас төптәрен [Гөлназ], сүп--сарын утай.* А. Игебаев.

**СҮПСЕНЕҮ** *ҡ. ҡар.* **семсенеү**. *Һыйыр, һарыҡ, бәрәстәр тау өҫтөндә .. ашаған булып сүпсенеп йөрөй.* Ғ. Дәүләтшин.

**СҮПӘКӘЙ: үпәкәй ҙә сүпәкәй тороу** яҡшы ғына, яратышып ҡына тороу. *Донъя булғас, төрлөһө була: үпәкәй ҙә сүпәкәй итеп кенә торолмай, талашып та киткән саҡтар була.* Т. Килмөхәмәтов. *Эйе шул, мин әйтәм, һинең менән үпәкәй ҙә сүпәкәй итеп ултырғанды яратыр инең [бисәкәй].* Ф. Иҫәнғолов.

**СҮРЕ** *и.* Арҡау ебен урап, һоҫа эсенә ҡуя торған үҙәк. *Епте сүрегә урау.* ■ *Сүренең бит мәңге эсе ҡыуыш, ә һуғылмай киндер сүреһеҙ.* Н. Нәжми.

**СҮРЕЛДӘТЕҮ** *ҡ. ҡар.* **сөрөлдәтеү**. *Кондуктор сүрелдәтеп һыбыҙғы һыҙғырта, паровоз гудок бирә, беҙ ҡуҙғалып китәбеҙ.* Ғ. Гәйнуллин.

**СҮРЕЛДӘҮ** *ҡ. ҡар.* **сөрөлдәү**. *Сүрелдәп кенә һыу аға. Яланда сиңерткә сүрелдәй.*

**СҮРЕЛЕ** *с.* Сүрегә уралған. *Сүреле еп.*

**СҮРЛӘК** *и. диал.* Сурағай.

**СҮРТӘЙЕҮ** *ҡ. диал.* **1.** Бүлтәйеү. *Яҫы маңлай аҫтынан ҡараған сөмөрт ҡара күҙҙәр, .. саҡ ҡына сүртәйгән ирендәр, асыҡ һөйкөмлө йөҙ. .. Барыһы, барыһы ла Зәкиәнеке.* Ғ. Аллаяров.

**2.** *ҡар.* **сурайыу** 1. *Яралар уңалды. Тик ҡабырға ғына, йыртҡыс [айыу] менән алыштың иҫтәлеге булып, сүртәйеп тороп ҡалды.* Т. Сәғитов.

**СҮРТӘЙТЕҮ** *ҡ. диал. ҡар.* **бүлтәйтеү**. *Ирендә сүртәйтеү.*

**СҮРӘ** [*ғәр.*] *и.* Ҡөрьәндең үҙенә башҡа бер исем менән аталған айырым бүлеге (бөтәһе 114 сүрә). *Хәҙрәт бик моңло итеп тәбарәк сүрәһен уҡыны.* М. Ғафури. *Мулла көйләп, көрьәндең әллә ҡайһы бер сүрәһен ятҡа уҡыны.* Ж. Кейекбаев.

**СҮРӘГӘЙ** *и. шул уҡ* **сүрәгәй өйрәк** (*ҡар.* **өйрәк** 1). *Ҡош оскоро сүрәгәй, ҡанат ҡаҡмай шуны алған.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**СҮРӘК** *и.* Тандыр утта бешкән йоҡа икмәк. *[Ҡыҙ] Таҙ алдына биҙәкле сеүәтә менән ҡаймаҡ, күпереп бешкән сүрәк килтереп ҡуйған* (Әкиәттән).

**СҮРӘКӘ** [1] *и. этн.* Керәшен татар ҡатындарының яулыҡ өҫтөнән текә итеп маңлайға ҡуя торған уҡа биҙәкле йәки сигеүле, оҙон киң ҡойроҡло баш кейеме. *[Маҡтымһылыу:] Түпый ҡашмау кеймәҫ наҙ инем дә, сүрәкәңде кейҙерҙең дә, гәүер.* «Маҡтымһылыу».

**СҮРӘКӘ** [2] *и.* Балалар уйыны (икегә бүленәләр, бер яҡ көтөүсе була; түңәрәк ояһ һыҙып, уртаһына ҡыҫҡа ҡаҙыҡ ҡағалар, уның башына осо элмәкләп яһалған бәләкәй ағас — сүрәкә ҡуялар; сиктән тороп, таяҡ менән ҡаҙыҡҡа һуғалар; сүрәкә оя эсенә төшһә, һуҡҡан кеше яна; осоп китһә, көтөүсе уны алып таяҡ төбөнә бәрә; бәреп, оя эсенә төшөрһә, тағы һуҡҡан кеше яна; сүрәкә ояға төшмәһә, һуҡҡан кеше уның ҡаҙыҡҡа тиклем булған алыҫлығын таяғы менән үлсәй; шулай итеп мәрәй йыялар; кемдең мәрәйе тейешле һанға тиҙерәк тула — шул еңә). *Малай-шалай сүрәкә һуға.* Р. Солтангәрәев.

**СҮРӘЛӘП** *р.* Һәр сүрәне айырым-айырым итеп. *Мин .. әфтиәкте, көрьәнде сүрәләп уҡып сығып, төрки китаптарын да арыу ғына уҡый ала инем.* Т. Йәнәби.

**СҮРӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *ҡар.* **һүрәт.** *Төрлө сүрәткә инеү.* ■ *[Егеттең атаһы:] Һеҙ был ҡара йыландан ҡурҡмағыҙ. Ул минең улым булыр, тик әле йылан сүрәтендә* (Әкиәттән).

**2.** *у.-в. клш* **сүрәттә** Ниндәйҙер хәлдә. *Уларҙың [Басировтарҙың] йортона барып етә алам, еткән сүрәттә лә өйҙәренә инергә баҙнат итмәм кеүек.* Д. Юлтый. *Килене киткән сүрәттә улын ҡалдырмаҫын да — бөтәһен дә ул белә ине.* Р. Низамов.

**СУС** *и.* **1.** Үҫемлек һабағынан талҡып алынған, әле иләнмәгән тәбиғи еп. *Баҫа сусе. Етен сусе. Киндер сусе. Сус иләү. // Сус арҡан. Сус дилбегә.* ■ *[Ғафур:] Киндерҙе ергә йәйеп, йә һыуға батырып тоторға кәрәк — шунһыҙ сифатлы сус алып булмай.* Ғ. Гәйнуллин. *Байназар сейәләтеп бәйләнгән сус бауҙы сисеп хитланманы.* Б. Бикбай.

**2.** Химик юл менән алынған шуға оҡшаш нәҙек еп. *Быяла сус. Химик сус.* ■ *Салауатта синтетик сус етештерелә башлаясаҡ. Уның продукцияһы нигеҙендә .. кейем фабрикаһы эшләйәсәк.* М. Хисмәтов.

**СҮСБӘРӘ** *и.* Эремсек билмәне. *Сусбәрә бешереү.*

**СҮСЕЛДӘК** *с.* Сүселдәп һөйләүсән. *Суселдәк катын.*

**СҮСЕЛДӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **сүселдәү** 1.

**СҮСЕЛДӘҮ** *к.* **1.** Сөсө теллләнеп һөйләү. *Бала менән суселдәп һөйләшеү. Суселдеге сығыу.*

**2.** Ризаһыҙлыҡ белдереп һөйләнеү; мыңғырлау. *[Рәхимә:] Йә, Диләнең күлдәге булмаһа, ана Хаяттың бер йыуылған күлдәген биреп торормон, әсәһе килеп төшкәс кенә суселдәмәһә.* Һ. Дәүләтшина.

**СҮСЕЛДӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **сүселдәү.** *[Аҡһаҡ кола — егеткә:] Татарҙарҙың ҡыҙҙары сабаталары сәңкәйеп, суселдәшеп сыҡтылар — ул да һиңә ярамаҫ.* «Аҡһаҡ кола».

**СҮСИНКӘ** [*рус.* чёсанки] *и. һөйл.* Калуш менән кейә торған йоҡа быйма. *Сусинкә кейеү.*

**СҮСЛЕ** *с.* Сүс (1 мәғ.) бирә торған. *Сусле үҫемлек.* ■ *Башҡортостанда киндер һәм етен кеүек сусле культуралар үҫтерелә.* М. Хисмәтов.

**СҮСТЕКӘЙ** *с.* Сөсө теллләнеп, күп һөйләүсән.

**СҮСӘНДЕ** *с. диал.* Сусанлаҡ. *Сусәнде кеше.*

**СҮСӘНЛӘК** *с. кар.* **сусанлаҡ.** *Сусәнләк кеше.*

**СҮСӘНЛӘҮ** *к. кар.* **сусанлау.**

**СҮСӘНӘК: сүсәнәк һаҡал** эйәк осонда ғына ослайып үҫкән һаҡал. *Сусәнәк һаҡаллы ҡарт.* ■ *Эйәк осонда һирәк кенә сусәнәк ҡара һаҡал [үҫкән] кеше: — Әйҙә, юлсы, түргә уҙ, ултыр, һыуһап килгәнһеңдер, бер-ике сынаяҡ сәй эсеп ал,— тине.* И. Көсәпҡол.

**СҮТӘШКӘ** [*рус.* сутяжник] *и. һөйл.* Даусыл, дәғүәсел.

● *Сутәшкәне баш итһәң, илеңде дауға ҡалдырыр.* Мәҡәл.

**СҮӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Яуызлыҡ.

□ **Сүә истиғмал ҡылыу** (*йәки* **итеү**) яуыз ниәттә файҙаланыу. *Рәсме хатты сүә истиғмал ҡылыуҙан һин [Ҡауам] оял.* Ш. Бабич.

**СФЕ́РА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Шар йәки уның эске йөҙө (Ер шарына, куккә ҡарата). *Ер сфераһы.*

**2.** *мат.* Бөтә нөктәләре лә үҙәктән тигеҙ алыҫлыҡта ятҡан йомоҡ нәмәнең йөҙө; түңәрәктең тышҡы йөҙө.

**3.** Нимәнеңдер хәрәкәт сиген күрһәткән арауыҡ йәки шул нәмәнең таралыу сиге. *Артиллерияның атыу сфераһы. Планетаның тартыу сфераһы.* / Ниндәйҙер эшмәкәрлек өлкәһе, мөнәсәбәттәр, мәнфәғәттәр сағылышы. *Етештереү сфераһы. Йогонто сфераһы. Хеҙмәтләндереү сфераһы.* ■ *Хеҙмәтте кешенең физик хәрәкәт сфераһы менән сикләнгән нәмә итеп ҡарауҙар күптән бөттө инде.* Ә. Харисов.

**4.** *кар.* **мөхит** 2. *Башҡа сфера. Үҙ сфераң.*

**5.** *кар.* **даирә** 2.

**СФЕРИК** *с.* **1.** Сфера (1, 2 мәғ.) рәүешендәге. *Сферик есем. Сферик йөҙләк. Сферик координатор. Сферик көҙгө. Сферик линза. Сферик майҙан. Сферик маятник.*

**2.** *мат.* Сферала (2 мәғ.) урынлашҡан. *Сферик өсмөйөш. Сферик функция.* / Сферала урынлашҡан геометрик фигураларҙың үҙенсәлеген өйрәнә торған. *Сферик геометрия. Сферик тригонометрия.*

**СФИНКС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Боронғо Египетта: һуҙылып ятҡан кеше башлы арыҫлан һүрәтендәге таш һын (фирғәүендең изге мәйетен һаҡлау билдәһе).

**2.** Боронғо грек мифологияһында: кәүҙәһе арыҫландыҡы, башы-түше ҡатындыҡы булған, Фива янындағы бер ҡаяла йәшәгән ҡанатлы зат (эйгән йомағын сисә алмаған юлсыларҙы, йәнәһе, үлтерә торған булған).

**СХЕ́МА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Нимәнеңдер төҙөлөшөн, системаһын йәки урынлашыу тәртибен ябайлаштырып күрһәткән һыҙма. *Дөйөм схема. Принципиаль схема. Структур схема. Функциональ схема. Берләшмәләр схемаһы. Оборона схемаһы. Радио схемаһы. Телефон схемаһы. Тоташтырыу схемаһы.*

**2.** Нимәнеңдер төп, дөйөм һыҙатта бирелгән планы. *Докладтың схемаһы. Әҫәрҙең схемаһы.*

**3.** *кит.* Ябайлаштырып, дөйөмләштереп бирелгән һүрәт, һын.

**СХЕМАЛАШТЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **схемалаштырыу.**

**СХЕМАЛАШТЫРЫУ** *к.* Схема рәүешендә, дөйөм һыҙатта биреү. *Схемалаштырып төҙөлгән карта. Схемалаштырып доклад төҙөү.*

**СХЕМАТИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Ябайлаштырып, ҡалыплаштырып биреү күренеше. *Схематизмға төшөү. Схематизмдан ҡотолоу.*

**СХЕМАТИК** *с.* **1.** Схема (1 мәғ.) рәүешендә төҙөлгән, схема булып торған. *Схематик карта. Схематик модель. Телефон аппаратын схематик төшөрөү.*

**2.** Ябайлаштырып, ҡалыплаштырып бирелгән. *Тормош күренештәрен һүрәтләү схематик төҫ алды.* Н. Зарипов.

**СХОД** [*рус.*] *и. иҫк.* Революцияға тиклемге Россияла ауыл общинаһы ағзаларының йыйылышы. *Ауыл сходы. Волость сходы.* ■ *Сходта һуғышҡа китәһе кешеләргә ауыл халҡы хәл кәҙәренсә акса һалды.* Ж. Кейекбаев.

**СХОЛА́СТ** [*рус.*] *и.* **1.** Схоластика (1 мәғ.) яҡлы кеше.

**2.** Схоластик (2 мәғ.) рәүештә фекер йөрөткән кеше. *Схоласт булыу.*

**СХОЛАСТИК** *с.* **1.** Схоластикаға (1 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Схоластик мәктәптәр.* ■ *Мәжит Ғафури әҫәрҙәрендә .. наҙанлыҡ тараткан схоластик мәҙрәсәләр, уларҙың етәкселәре — муллалар, ишандар асы тәнҡит ителде.* З. Шәрҡи.

**2.** Тормоштан, тәжрибәнән айырылған, формаль. *Схоластик тәнҡит. Схоластик фекерләү.* ■ *Уҡытыу сит телдә — ғәрәп телендә алып барылып, дини дәреслектәрҙе аңламайынса ятлауға, схоластик, мәғәнәһеҙ бәхәстәргә ҡайтып ҡала ине.* Ғ. Рамазанов.

**СХОЛА́СТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Формаль, яһалма логик дәлилдәр ярҙамында дин догматтарына теоретик аңлатма биреү маҡсатын ҡуйған хакимлек итеүсе урта быуат философик йүнәлеше.

**2.** Тормоштан, тәжрибәнән айырылған формаль белем; буш аҡыл һатыш. *Схоластика менән башты томалау.*

**СЦЕНАРИЙ** *и.* **1.** Фильм эшләү өсөн яҙылған әҙәби драматик әҫәр (персонаждарҙың эше, телмәре ентекләп яҙылған була). *Сценарий яҙыу. Фильмдың сценарийы.*

**2.** Пьесаның, байрамдың һ. б. сюжетлы схемаһы, планы. *Әҙәби сценарий. Балет сценарийы. Режиссер сценарийы.* ■ *Байрамдың сценарийы ныҡлы уйланып, кешеләрҙең бөгөнгө юғары зауығын иҫәпкә алып төҙөлөргә тейеш.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 28 декабрь.

**3.** *театр.* Пьесала ҡатнашҡан кешеләрҙең сәхнәгә сығыу тәртибен һәм ваҡытын күрһәтеп төҙөлгән исемлек.

**СЦЕНАРИСТ** *и.* Сценарий (1, 2 мәғ.) яҙған автор. *Кино сценарисы. Театр сценарисы.*

**СЧЁТ**[1] [*рус.*] *и.* **1.** Нимә өсөндөр түләнергә тейешле аҡсаның күләмен күрһәтеп яҙылған документ. *Өҫтәлдә әллә ниндәй счёт ҡағыҙҙары, ҡаты ҡағыҙға шаҡмаҡлап йәбештерелгән төрлө ситса киҫәктәре ята.* С. Агиш.

**2.** *бухг.* Финанс операцияһы, шулай уҡ айырым учреждение, предприятие йәки кешеләр алып барған финанс операцияларын иҫәптә тотоу өсөн хеҙмәт иткән документ. *Ағымдағы счёт. Вкладтар счёты. Иҫәп счёты. Счёт асыу. Счётка аҡса күсереү. Счётты ябыу.* ■ *Иҫәп ссуда операциялары .. буйынса счёттарҙың хәлен [таблица күрһәтә].* «Совет Башҡортостаны-ның ун йылы», 1929.

**СЧЁТ**[2] [*рус.* счёты] *и.* Арҡыры тимер сыбыҡтарға күсереп йөрөтмәле унар-унар төймә теҙеп, дүрт мөйөшлө рамға ҡуйып яһалған ябай иҫәп ҡоралы. *Счёт төймәһе. Счётҡа һалыу.* ■ *Приказчик .. сөйҙәге счётты алып, бармаҡтарын төймәләр өҫтөндә күҙ эйәрмәҫлек ашығыс уйнатып алды.* Һ. Дәүләтшина.

**СЧЁТЧИК** [*рус.*] *и.* Нимәнеңдер иҫәбен сығара йәки алып бара торған прибор. *Тиҙлек счётчигы. Электр счётчигы.*

**СЪЕЗД** [*рус.*] *и.* Эре ойошма һәм халыҡ вәкилдәренең ижтимағи-политик йәки фәнни әһәмиәт тотҡан оло йыйылышы. *Съезд делегаты. Профсоюздар съезды. Уҡытыусылар съезы.* ■ *Башҡортостан яҙыусыларының 1964 йылғы съезы прозабыҙҙы тикшереүгә арналғайны.* Ә. Вахитов. / Ниндәйҙер ойошманың, йәмғиәт, партияның юғары орган булараҡ саҡырылған йыйылышы. *[Трофимов:] Съезд ниндәй йүнәлеш алыр?.. Башҡортостан республикаһы һәм уның халҡының яҙмышы ошонда хәл ителәсәк.* Я. Хамматов.

**СЫБА** *и.* Киндерҙән йәки аҡ йөндән һуғып, билләп тегелгән өҫкө кейем. *Сыба итәге. Сыба салғыйы.* // *Сыба бишмәт.*

**СЫБАҒАС** *и. диал. ҡар.* **шыбағас**[1]. *Ашлыҡты .. сыбағас менән һуғалар, һуңынан ҡул менән елдә елгәрәләр.* М. Ғафури.

**СЫБАЙ**[1] *и.* Тар ғына буй һыҙат. *Болот бер сыбай булып тора.* // *Сыбай ҡашҡа ат.* ■ *Йәшел генә сана, зәңгәр дуға, килешә төшә сыбай ҙа ҡашҡаға* (Халыҡ йырынан).

**СЫБАЙ**[2] *и. диал.* Сыбата. *Аттарҙы сыбай егеү.*

**СЫБАЙЛАП** *р.* Тар ғына буй һыҙат булып. *Сыбайлап ҡына болот ҡалҡҡан.* ■ *Һултан йылғаһының буйына сыбайлап үҫкән ҡайындарҙы .. ел сайҡай.* Т. Хәйбуллин.

**СЫБАЛЫУ** *ҡ. диал.* Сыуалыу. *Ауға сыбалыу. Бау сыбалыу. Фекер сыбалыу.*

**СЫБАР** *с.* **1.** Бер төҫтәге ерлеккә икенсе төҫ төшкән, ваҡ-ваҡ таплы. *Күк сыбар. Ҡара сыбар. Ҡыҙыл сыбар. Сыбар ат. Сыбар ашъяулыҡ. Сыбар күлдәк. Сыбар сәскә. Сыбар яулыҡ.* ■ *Яңы быҙаулаған сыбар тана һыйыр, сабыйын һағынып, мөңрәй-мөңрәй ауылға ыңғайлай ҙа тора.* Ф. Иҫәнғолов. *Сыбар ҙа ғына ҡанат аҡ ҡарсыға оҫамы икән күктә ҡош күреп* (Халыҡ йырынан). **Алма сыбар** ике янбашы алма эрелек сыбар (атҡа ҡарата). *Йәш уләнгә тышап ебәр алма сыбар атыңды.* Б. Бикбай. **Баҫма сыбар** бармаҡ менән баҫҡан кеүек, төртөк-төртөк сыбар. *Баҫма сыбар һыйыр.* **Сыбар ала** ваҡ ала. *[Егет:] Юғалттым мин йылҡымды, билдәленән бишәү юҡ: тубығы тимгел туры юҡ, сыңғыҙ ерән бейә юҡ, сыҫҡан һыртлы ҡола юҡ, сыбар ала тайы юҡ, ялы ергә һөйрәлгән аҡһаҡ ҡола айғыр юҡ.* «Аҡһаҡ ҡола». **Тәңкә сыбар** тәңкә рәүешендәге биҙәкле сыбар.

**2.** *күсм.* Бер иш булмаған, төрлө-төрлө. *Бында .. рустар ҙа, сыуаштар ҙа, татарҙар ҙа бар. Уларҙың ҡыуыштары, сатырҙары .. төрлө ҙурлыҡта һәм сыбарҙар.* Һ. Дәүләтшина. *Алда сыбар халыҡ диңгеҙе күренә.* Д. Юлтый. / Бер тигеҙ йәки бер сифатлы түгел; төрлө кимәлле йәки сифатлы. *Төрлөһө төрлөсә кейенгән был егеттәрҙең һәрби әҙерлектәре лә бик сыбар ине.* К. Мәргән. / Төрлө-төрлө күренештәрҙе, ваҡиғаларҙы эсенә алған. *Беҙҙең заман бик сыбар заман.* ■ *Әйтмә инде, хәҙер уның дүрт яғы ҡибла бит,— тигән ғәләмәт төрлө сыбар хәбәрҙәр тулып китте.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *күсм.* Еңел, тиҙ үҙгәреп торған, даими булмаған, алмашынып торған (хис, тойғоға ҡарата). *[Әмир:] Ҡыҙыҡ кеше. Күптән түгел комбайн тип теше төшә ине, әле ҡайғыһы ла юҡ. Ниндәйҙер сыбар күңелле.* Х. Ғиләжев. *Мөхәббәт утында яныу сыбар йән эше түгел.* Ә. Атнабаев.

**СЫБАРҒАНАТ** *и.* Ҡанаты, ҡорһағы сыбар ҡара һыҙатлы һәм таплы, ҡарышлауығы үҫемлектәрҙең ҡорт-ҡосо булған төнгө күбәләк.

**СЫБАРЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **сыбарлау.** *Хикәйәнең теле диалектизмдар менән сыбарланған. Ялан төрлө сәскә менән сыбарланған.*

**2.** Сыбарға (1 мәғ.) әйләнеү, сыбар булыу; сыбар төҫкә инеү. *Сыбарланып күренеү. Сыбарланып тороу.* ■ *Ҡала өҫтө электр йондоҙҙары менән сыбарланған.* С. Агиш.

**3.** Еңелсә тулҡынланыу, һелкенеү (һыуға ҡарата). *Ҡояш батты, һалҡын ел иҫте, сыбарланды түңәрәк күл өҫтө.* Б. Ишемғол.

**4.** Асыҡ булып күренмәү; ҡараңғыланыу, томанланыу. *Ҡолсобойҙың .. башы әйләнде, күҙ алды сыбарланды.* Я. Хамматов. *Башта мин бик ҡаушаным, күҙ алдым сыбарланды.* М. Ғафури.

**СЫБАРЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **сыбарлау.** *Аҡ ҡағыҙҙы сыбарлаттым хаттар яҙып иркәмә* (Халыҡ йырынан).

**СЫБАРЛАУ** *ҡ.* **1.** Сыбарға (1 мәғ.) әйләндереү, сыбар итеү. *Яланды күк сәскә сыбарла-*

*ған.* ■ *Фотокарточкалағы кешеләрҙең кем икәнен .. таныҙлыҡ түгел: себен сыбарлап бөткән.* Б. Бикбай. *Сыбарлайбыҙ карҙың өҫтөн бейеп һәм уйнап.* Ф. Рәхимғолова.

**2.** *күсм.* Бер иш булмаған, төрлө-төрлө нәмәләр менән ҡаплатыу. *Баҫыуҙы көлтәләр сыбарлаған.* / Нимәнелер арҡыс-торҡос һыҙғылау, билдәләр менән ҡаплау, тултырыу. *Дәфтәрҙе сыбарлап яҙып бөтөрөү.* ■ *Тимер .. кәкре-бөкрө, эреле-ваҡлы хәрефтәр яҙып, тәҙрәнең өҫкө күҙғәнәген сыбарлап бөттө.* Б. Бикбай. / Төрлө сифаттағы нәмәләр менән аралаштырыу; сыбар итеү. *Шелтә бирел Ҡашай Бәшировка, комячейка ҡарар сығарған. Ҡара такта. Бында Бәшировтың исеме тора, уны сыбарлап.* М. Тажи.

**3.** *күсм.* Һөйләмде, хәбәрҙе һ. б. төрлө биҙәктәр менән биҙәү, биҙәгән һүҙҙәр индереү. *Ғилажи .. коро агитатор ғына түгел, бәлки [һөйләгән һүҙен] ярлы ғүмеренең тәжрибәләре, бай халыҡ мәҡәле, хикәйәләре менән сыбарлап, матурлап бирә ине.* А. Таһиров.

**СЫБАРЛЫҠ** *и.* Төрлө һөҙөмтә. *Уңыш алыуҙағы сыбарлыҡ. Фекер сыбарлығы.*

**СЫБАРСАЙ** *и.* Алаҡас турғайҙар ғаиләһенә ҡараған оҙон кәкре суҡышлы, осло ҡойроҡло, көрән һыртлы, йәшел ҡанат-ҡойроҡло, зәңгәр ҡорһаҡлы, тамағы һары, сыйырсыҡ ҙурлыҡ ҡош.

**СЫБАТА** *и.* **1.** Аттарҙы аллы-артлы ҡуйып егеү төрө. *Сыбата егеү.* ■ *[Ҡотлоюл] кола ат менән һоро бейәне сыбата һалып, .. ҡупшылап еген бирҙе.* Ғ. Дәүләтшин. *Иртәгеһен ул агай сыбата егелгән почта аты менән Темәс волосына ҡарап юл тотто.* С. Кулибай.

**2.** *с. мәғ.* Аллы-артлы ҡуйып егелгән. *Сыбата ат.*

**СЫБАТАЛАУ** *к.* Аттарҙы аллы-артлы ҡуйып, теҙеп егеү. *Ҡашауай санаға ярһыу аттарҙы сыбаталап еген, ҡышҡы юлдан елдәй елеүҙең матурлығын, рәхәтлеген татығаныгыҙ бармы?* Н. Нәжми.

**СЫБАТМА** *и.* Тары көлтәһен өҫтө-өҫтөнә яртылаш-яртылаш ҡатлап һалып теҙгән өйөм.

**СЫБАТЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **сыбатыу.**

**2.** Бер буй булып теҙелеү. *Сыбатылып үҫкән ағастар.*

**СЫБАТЫУ** *к.* **1.** Оҙон итеп, һуҙып тағатыу. *Йомғаҡ сыбатыу.*

**2.** Оҙонға һуҙыу. *[Ямал:] Һүҙҙе бер сыбатып ебәрһәң, гәйбәт уҡ булмаһа ла, ғибрәт өсөн һөйләрлек нәмә табыла инде ул.* М. Тажи.

**СЫБЫҠ** *и.* **1.** Ҡырҡып, һындырып алынған нәҙек ботаҡ. *Тал сыбығы. Ергә сыбыҡ ҡаҙау. Муйыл сыбығынан арба ситәне үреү.* ■ *Гөлйөҙөм .. ҡыу тал сыбыҡтарын шатырлатып яғып ебәрҙе.* һ. Дәүләтшина. *Тик беҙ ауырлыҡтан, йәш сыбыҡтай, һынып ҡалыр кеше түгелбеҙ.* Х. Ҡунаҡбай. / *иҫк.* Яза рәүешендә һуҡтырыу өсөн ҡулланылған тал йәки бүтән шыйыҡ ботаҡ. *Сыбыҡ менән ҡағыҙ ҡулдарында, Төхфәт кеүек яуыз ир ҡайҙа* (Халыҡ йырынан).

**2.** *һөйл.* Сыбыҡтимер, сым. *Алюмин сыбыҡ. Телефон сыбығы.* ■ *Өҫтәлдең .. һул яғында төрлө тимер һәм баҡыр сыбыҡтарҙы катушкаға сорнау өсөн эшләнгән ябай ғына йәйләнмә.* Ә. Вәли.

**3.** Яңы үҫеп килгән ваҡ ағас йәки эре ҡыу үлән. *Алма сыбығы ултыртыу.* ■ *«Ошомо матур тауҙарың,— тим.— Көйөп бөткән түбәләрендә ат ҡыуырлыҡ сыбыҡ, олтораҡлыҡ үлән булһасы».* Ә. Вахитов. *Һепертмә ел эрем сыбыҡтарында һыҙғыра.* Ш. Янбаев.

**4.** Теләһә ниндәй ағас ботағы, сытыр. *Аяҡ аҫтында сыбыҡ тулып ята. Сыбыҡ йыйып ут яҡтым.*

◆ **Ауыҙын ҡыу сыбыҡ менән һөрткән** *кар.* **ауыҙ. Бер сыбыҡтан ҡыуылған** берeһен маҡтап, береһен яманларлыҡ түгел; бөтәһе лә бер. *Беҙ, бисәләр, барыбыҙ ҙа бер сыбыҡтан ҡыуылған инде, .. ҡайыҙлаусы ғына юҡ бит беҙҙе.* Ф. Иҫәнғолов. **Бысраҡ сыбыҡ менән ҡыуыу** хурлап, яманлап, аранан ҡыуыу. *[Булат:] Гәрәй — зәһәр дошманмы? Дошман. Халыҡ уны үҙ араһынан бысраҡ сыбыҡ менән ҡыуҙымы? Ҡыуҙы. Ә ул .. унан ҡасып ҡайтҡан.* Б. Бикбай. **Ҡара сыбыҡ** япраҡ ярып өлгөрмәгән ағас, япраҡһыҙ ағас. *Кәкүк ҡара сыбыҡҡа килһә, ашлыҡ уңа; япраҡҡа килһә, иллек була.* Һынамыш. **Ҡармаҡ сыбығы** ҡармаҡ тағып, балыҡ тота торған сыбыҡ. *Сәгиҙә .. шешкә теҙгән балыҡтарҙы һәм ҡармаҡ сыбығын тотоп, уның [Тайморзиндың] артынан эйәрҙе.* М. Тажи. **Сыбыҡ осо** алыҫ туған. *Ғәфиәт Арҫланов данлы пугачевсы Кинйә Арҫлановтың сыбыҡ осо була, шул Кинйә ауылында тыуып үҫә.* Б. Бикбай. **Тал сыбыҡтай** нәҙекәй, зифа (буй-һынға ҡарата). *Тал сыбыҡтай үҫкән буйҙарыңдың кәҙерен белеп торған ир ҡайҙа* (Халыҡ йырынан).

**СЫБЫҠЛАНЫУ** *к.* Сыбыҡ (1 мәғ.) һымаҡҡа әйләнеү, сыбыҡ һымаҡ булыу.

**СЫБЫҠЛАУ** *к.* **1.** Сыбыҡ (1 мәғ.) менән һуҡҡылау (йомшартыу, туҙанын ҡағыу өсөн). *Йөндө сыбыҡлау. Сыбыҡлап ҡағыу.*

**2.** Сыбыҡ менән һыҙырыу; сыптырыу. *Атты сыбыҡлау. Кешене сыбыҡлау.*

**3.** *күсм.* Кемделер ситләтеү, ҡыйырһытыу; ҡағыу. *Шулай итеп, донъя бер саҡ Юламан картты төрлөсә сыбыҡларға тотондо. .. Ай һай ауыр булды Юламан картҡа.* З. Биишева. / Ҡаты тәнҡитләү; бешеү, эрләү. *Йыйылышта бригадирҙы сыбыҡлап алдылар.*

● *Тунды сыбыҡлап кейһәң, йылы була.* Мәҡәл.

**СЫБЫҠ-САБЫҠ** *и. йыйн.* Ботаҡтар, ваҡ ағас киҫәктәре. *Сыбыҡ-сабыҡ йыйыу.* ■ *Ағасты яурынға һалып, куҙғалып китеүем булды, аяҡ аҫтындағы сыбыҡ-сабыҡты емерә баҫып, тап минең тәңгәлгә .. айыу килеп сыҡмаһынмы!* С. Кулибай. *Малай кеҫәһенән шырпы алып, кәбән эргәһендә өйөлөп ятҡан сыбыҡ-сабыҡҡа ут төртөп ебәргән* (Әкиәттән).

**СЫБЫҠТИМЕР** *и.* Нәҙек оҙон бау, еп рәүешендә яһалған төрлө сым. *Баҡыр сыбыҡтимер. Ҡорос сыбыҡтимер. Йыуан сыбыҡтимер.* ■ *[Булат:] Нәҙек сыбыҡтимерҙе [мин] Рәхимә еңгәмдәрҙең ҡапҡаһынан сисеп алғайным.* К. Кинйәбулатова.

**СЫБЫРЛЫҠ** *и. диал.* Ваҡ бала, ыбыр-сыбыр бала. *Беҙ мәктәптән ҡайтҡанда, Нурыйҙың сыбырлыҡтары беҙҙең баҡсала йөрөй ине.* Р. Ғабдрахманов.

**СЫБЫРТҠЫ** *и.* Мал ҡыуыр өсөн осон нәҙегәйтеп йүкәнән, ҡайыштан һ. б. ишкән йәки үргән һаплы бау. *Сыбыртҡы һабы. Ҡайыш сыбыртҡы. Йүкә сыбыртҡы. Оҙон сыбыртҡы. Сыбыртҡы ишеү. Сыбыртҡы үреү.* ■ *Сыбыртҡыһы һуң сыбыртҡы һынлымы ни! Һигеҙҙән үрелгән, суҡтары ғына ни тора. Һабы ла тоторға йәтеш кенә.* Р. Низамов. *Аттар арҡаларына сыбыртҡы төшөү менән ҡапыл ғына юртырға кереште.* С. Агиш. / *күсм.* Ҡайҙалыр әйҙәй, ҡыуа торған нәмә. *[Байназар:] Килә күрегеҙ, иптәш Дауытов, югиһә район етәкселәре беҙҙе онота башланы. [Дауытов:] Ә быныһы, минеңсә, бик яҡшы. Тимәк, һеҙгә агитация ла, сыбыртҡы ла кәрәкмәй.* Б. Бикбай.

● *Яҡшы атҡа сыбыртҡы кәрәкмәй.* Әйтем.

**СЫБЫРТҠЫЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **сыбыртҡылау.** *Сыбыртҡыланған сабан ат.*

**СЫБЫРТҠЫЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **сыбыртҡылау.** *Атты сыбыртҡылатыу.*

**СЫБЫРТҠЫЛАУ** *к.* **1.** Сыбыртҡы менән туҡмау, һуғыу. *Һыу һөлөгөндәй һимеҙ аттар .. Алтынгужаның сыбыртҡылап ҡыуыуы сәбәпле, тигеҙ ерҙә лобогрейканы осортоп ҡына алып бара.* Ғ. Дәүләтшин. *Сабан атты сыбыртҡылап ҡыуып, күрше ауылға китеп баралар.* М. Хәй. / *күсм.* Нимәлер эшләргә көсләү, мәжбүр итеү. *Сыбыртҡылап эшләтеү.* ■ *— Беҙҙең .. колхоз председателе Ғаббас ҡайнаға .. үксәгә баҫып, арттан сыбыртҡылап ҡына йөрөй.* М. Тажи.

**2.** *күсм.* Бик ныҡ тәнҡитләү, эрләү. *[Директор:] Әле ул [редактор] һин килерҙән алда ғына мине байтаҡ сыбыртҡылап алды.* Б. Бикбай.

**СЫВОРОТКА** [*рус.*] *и.* Ҡан һәм лимфа ойошҡанда алынған шыйыҡлыҡ (медицинала дауалау һәм диагноз ҡуйыу өсөн ҡулланыла). *Грипп сывороткаһы. Дифтерияға ҡаршы сыворотка.*

**СЫҒАН** *и.* Нимәнелер аша сыға йәки нимәлер сығара торған урын. *Кисеү сығаны.* **Бүрәнә сығаны** йылғанан ярға бүрәнә сығара торған урын.

♦ **Сыған һуғыу** сарҙан [2] ситкә ырғып, юл йәшереү (ҡуянға ҡарата).

**СЫҒАНА** *р. һөйл.* Бик ныҡ. *Сығана ҡара ҡаш.*

**СЫҒАНАҠ** [1] *и.* **1.** Ер аҫтынан тәбиғи рәүештә һыу һ. б. сығып ятҡан урын; күҙәү. *Көкөрт сығанағы. Ҡайнар һыу сығанағы.*

**2.** *күсм.* Нимәнелер барлыҡҡа килтергән, уға нигеҙ, башланғыс булып торған нәмә. *Аҙыҡ сығанағы. Аң-белем сығанағы. Сырьё сығанағы.* ■ *Көрәштең сығанағы — өмөт һәм ышаныс.* Ә. Вахитов. *Эш — бөтә яҡшылыҡтың сығанағы.* Ш. Насыров.

**3.** Ниндәйҙер мәғлүмәт, хәбәр биргән кеше йәки нәмә. *Тарихи сығанаҡ. Рәсми сығанаҡ. Теоретик сығанаҡ.*

**4.** *махс.* Фәнни тикшеренеүҙә файҙаланылған төрлө мәғлүмәт (яҙма ҡомартҡы, документ һ. б.). *Яҙма сығанаҡтарға таяныу.*

**СЫҒАНАҠ** [2]: **сығанаҡ бармаҡ** баш бармаҡтан һанағанда, дүртенсе бармаҡ.

**СЫҒАНАҠ** [3]: **сығанаҡ килеш** «кемдән», «нимәнән» һорауҙарына яуап биргән килеш. *Сығанаҡ килештә килгән һүҙ. Сығанаҡ килеш ялғауы.*

**СЫҒАНАҠ** [4] *и. диал. ҡар.* **терһәк** 1. *Сығанаҡҡа таяныу.*

**СЫҒАНАҠ** [5], **сығанаҡ тимер** *и. диал. ҡар.* **күгән** [1] 1.

**СЫҒАНСАҠ: сығансаҡ бармаҡ** *диал.* сығанаҡ бармаҡ (ҡар. сығанаҡ [2]).

**СЫҒАРМА** *и. ҡар.* **айырма** [2]. *Ҡагиҙәнән сығарма яһау.*

**СЫҒАРТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **сығарыу** 1—3, 5, 7, 8, 21—24, 29, 30, 32. *Балсыҡ сығартыу. Мейес сығартыу. Ҡарар сығартыу.*

**СЫҒАРЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **сығарыу** 1—3, 5—8, 15, 18, 19, 21—25, 29—33. *Сатлыҡлап сығарылған мейес. Тикшереүгә сығарылыу. Эшләп сығарылыу. Эштән сығарылыу.* ■ *Беренсе дәрес бөтөү менән балалар ял итергә тышҡа сығарылды.* Ғ. Дәүләтшин.

**СЫҒАРЫЛЫШ** *и.* **1.** Уҡыу йортон бер ваҡытта тамамлаған уҡыусылар төркөмө. *Мәктәптең тәүге сығарылышы.* ■ *Һуңғы ҡыңғырау шылтырағандан һуң, мәктәптә имтихандар башланды. Ә унан һуң .. сығарылыш кисәһе.* Р. Хәкимов.

**2.** Бер юлы баҫып ғәмәлгә сығарылған бер үк төрлө китап йәки башҡа нәмә. *Лотореяның сираттағы сығарылышы.*

**СЫҒАРЫУ** *к.* **1.** Йорт, бүлмә һ. б. кеүек нәмәнең эсенән ҡайҙалыр ебәреү, ҡыуыу. *Бүлмәнән сығарыу. Ишектән сығарыу. Тәҙрәнән сығарыу.* ■ *Ғәләү иплән һөйләп биргәс, [Шәхми бай] Ҡәмәр ҡортҡаны .. өйҙән ҡыуып сығарҙы ла ебәрҙе.* Т. Йәнәби. / Кемдеңдер ҡайҙалыр ҡатнашыуын туҡтатыу йәки ағзалыҡтан ҡыуыу. *Партбюро составынан сығарыу. Уйындан сығарыу. Һуғыштан сығарыу.* / Йәшәгән, эшләгән һ. б. урындан ебәреү, ҡыуыу. *Квартиранан сығарыу. Уҡытыуҙан сығарыу. Эштән сығарыу.* ■ *Атыш баҫылғас, атаһы .. сығып белешеп килде. Ул арала тегеләрҙе [аҡтарҙы] ҡыҙылдар тапалатып килеп [ауылдан] сығарып ебәргәндәр икән.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Ҡайҙандыр айырып, ситкә йүнәлтеү. *Тышҡа сығарып ебәреү.* ■ *Кисә мин Разия апайға иренең һуғышта үлеүе хаҡында хәбәр килгәнен ишеткәйнем. Шуға ла ул бөгөн газета, хаттар таратырға үҙенең урынына ҡыҙын сығарған булғандыр.* Н. Мусин. / Ниндәйҙер маҡсатта ҡайҙалыр йүнәлтеү. *Һунарға сығарау. Эшкә сығарыу. Юлға сығарыу.* / Ниндәйҙер бер урынға, арауыҡҡа килтереп ҡуйыу. *Кеше алдына сығарып баҫтырыу. Таҡтаға сығарыу. Уртаға сығарыу.* ■ *Сибай драма театры минең «Өҙөлгән моң» исемле пьесамды сәхнәгә сығара.* К. Мәргән. *Мәүлет бай .. бесәй кеүек кенә баҫып, ауылдың һыртынараҡ сығарып һалынған мәсеткә ҡарай йүнәлде.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Нимәнелер киҫтереп үткәреү, аша йүнәлтеү, хәрәкәт иттереү. *Йылға аша сығарыу. Кисеүҙән сығарыу. Үрҙе сығарыу.* ■ *[Тәнзилә — Сәгиҙәгә:] Ошо юл ҡайҙа булһа ла берәр ергә апарып сығарыр. Был [алдағы йылға] беҙҙең Ташлыйылғаға барып ҡоя торған һыуҙыр әле.* М. Тажи.

**4.** Борҡотоп, ағым-ағым итеп юғары күтәреү. *Паровоз пар сығара. Самауыр боҫ сығара.* ■ *Бына заводтың һауаға төтөн сығарып ултырған мөрйәләре.* М. Ғафури.

**5.** Эштә, тормошта яңы шартҡа ҡуйыу. *Иреккә сығарыу. Ирҡенгә сығарыу. Оставкаға сығарыу. Пенсияға сығарыу. Рәхәткә сығарыу.* ■ *Онотмағыҙ, иптәштәр, синфи көрәштә тик беҙҙең большевиктар юлы ғына тулы еңеүгә сығарасаҡ.* Һ. Дәүләтшина. / Берәй һүҙ, хәбәргә һ. б. ниндәйҙер мәғәнә, баһа биреүгә ҡарата. *Бушҡа сығарыу. Дөрөҫкә сығарыу. Насарға сығарыу. Юҡҡа сығарыу. Ялғанға сығарыу.*

**6.** Нимәнелер урындан-урынға күсереү. *Баҫыуға ашлама сығарыу. Һыуҙан бүрәнә сығарыу.* ■ *Ҡырҡырһың да [ағасты], ырҡҡанын да сығара алмай ятырһың.* Т. Килмөхәмәтов. / Йыл миҙгелдәренең береһенән икенсеһенә күсереү. *Йәйгә сығарыу. Ҡышты сығарыу. Яҙға сығарыу.* / Билдәләнгән ваҡытты үткәреү, белмәй ҡалыу. *Командировка срогын сығарыу.*

**7.** Ниндәйҙер дини йола атҡартыу, уҡытыу. *Ясин сығарыу.* ■ *Әсәй .. Фәхри бабайҙар менән кәңәш итеп, көрьән сығарып өшкөртөргә ҡарар иткәндәрен атайға һөйләне.* М. Ғафури.

**8.** Нимәнеңдер эсенән икенсе бер нәмәне һурып, тартып алыу. *Мейестән икмәк сығарыу. Шәмдең милтәһен сығарыу.* ■ *— Ах, сволочтар! — тинем дә, дошманға ташланырға әҙерләнгәндәй, кабуранан наганымды тартып сығарҙым.* Б. Ишемғол. / Нимәнелер урынынан ҡуҙғатыу, тайҙырыу. *Ғәлиәхмәт ағай бер ҙә көтмәгәндә йығылып ҡулының быуынын сығарғайны.* Ф. Рәхимғолова. / Нимәнелер бушатып, ҡуптарып йәки һурып алыу. *Тәгәрмәсте күсәрҙән сығарыу. Тәҙрәнең ҡапҡасын аҡтарып сығарыу.*

**9.** Тупланған, йыйылған, барлыҡҡа килгән нәмәне бүлеп алыу, айырыу. *Керҙең керен сығарыу.* / Тирә-яҡҡа таратыу (еҫте). *Өйгә еҫ сығарыу. Хушбый еҫе сығарыу.*

**10.** Хасил итеп яңғыратыу, таратыу (тауышты, өндө) *Мунса эсенең бөркөүе килеште ахыры — хужа әфәнде башҡаса тауыш-тын сығармай йән белмәй йоҡоға талды.* Ф. Иҫәнғолов. / Нимәлер әйтеп ишеттереү (һүҙҙе, хәбәрҙе). *Бикморҙа ҡарт, аңла, әгәр ҙә ундай һүҙ сығарып халыҡты буталай торған булһаң, миңә ҡарап упкәләмә.* Т. Хәйбуллин.

**11.** Ниндәйҙер хәлдән арындырыу, ҡотолдороу. *Ғазаптан сығарыу. Ҡыйынлыҡтан сығарыу. Һәләкәттән сығарыу.* ■ *Тик ошо [йыуаныслы] ваҡиға ғына картты ниндәйҙер ауыр һүлпәнлек, күңел төшөнкөлөгөнән сығарҙы.* Ә. Чаныш.

**12.** Ҡайҙандыр эстән, төптән тышҡа ағыҙыу, тамыҙыу; аҫтан типтереү, урғылтыу. *Ағыҙып сығарыу. Йәш сығарыу. Тир сығарыу.* ■ *Шул рәүеш бөткәс ололау ижраһы, бар ҙа һөйөнөстән сығарғас күҙ йәше, .. һөйләне Иблис тәшәккер хөтбәһен.* Ш. Бабич. / Сигенән артылдырыу, ташытыу (һыуҙы, йылғаны). *Ҡойма ямғыр йылғаны ярынан сығарҙы.*

**13.** Ниндәйҙер ерлектә үҫтереү, барлыҡҡа килтереү. *Мөгөҙ сығарыу. Мыйыҡ сығарыу. Теш сығарыу. Себеш ҡанат сығарған.*

**14.** Ниндәйҙер кисереште күрһәтеп сағылдырыу. *Асыуҙы йөҙгә сығарыу. Шатлыҡты тышҡа сығарыу.* ■ *[Өммәт] бер ваҡытта ла күргән ауырлығын төҫөнә сығармай.* Д. Юлтый. *Аҡ [панама] кейгән кеше башҡалар менән бик ябай йөҙөндә бер төрлө лә үҙгәреш сығармай күреште.* С. Агиш.

**15.** Ниндәйҙер сифатҡа эйә итеү. *Яҡшы врач итеп сығарыу. Композитор итеп сығарыу.*

**16.** Нимәнеңдер сифатын, эшләнешен еренә еткереү йәки килтереп еткермәү. *Насар сығарыу. Тоноҡ сығарыу. Шәп сығарыу.*

**17.** Нимәнеңдер һөҙөмтәһе итеп барлыҡҡа килтереү, тыуҙырыу. *Тоғҡарлыҡ сығарыу. Төрлөсә килтереп сығарыу.* ■ *Елеп үткән ерендә тау сығарған Аҡбуҙат.* «Аҡбуҙат». / Ниндәйҙер эш һ. б. һөҙөмтәһендә берәй хәл тыуҙырыу. *Бәхәс сығарыу. Талаш сығарыу.* ■ *Кузьма тағы үҙенең ҡыҙыҡтарын ҡуптарып сығарҙы, .. былдай темаға уның бер ҙә һөйләгәне юҡ ине.* С. Агиш. *[Еңгә:] Ниғмәтйән ҡайтып йөрөмәһен, йә тәмәке төшөрөп ут-күҙ сығарып ҡуйыр.* Ф. Иҫәнғолов. /Нимәлер булдырыу, бар итеү; табыу. *Табыш сығарыу. Файҙа сығарыу.*

**18.** Ҡайҙандыр нимәлер эҙләп, ҡаҙып һ. б. алыу. *Баҙҙан бер көршәк көмөш аҡса табып сығарҙы.* / Ер аҫтынан табып алыу. *Тәбиғи газ сығарыу.*

**19.** Нимә менәндер тәьмин итеү, индереү; ҡулға биреү. *Өлөш сығарыу.* ■ *[Абыстай:] Ризыҡҡа яҙып, насип булһа, гөшөрөн, закатын сығарарға кәрәк.* Ғ. Ғүмәр.

**20.** Ниндәйҙер эш-хәлде барлыҡҡа килтереү, тыуҙырыу. *Бола сығарыу. Буран сығарыу. Дау сығарыу. Тауыш сығарыу. Яу сығарыу.*

**21.** Ниндәйҙер эште тормошҡа ашырыу, ғәмәлгә индереү. *Бойороҡ сығарыу. Декрет сығарыу. Ҡарар сығарыу.* / Ташҡа баҫып донъя күрһәтеү. *Китап сығарыу. Һүҙлек сығарыу.* ■ *Дүртенсе курстан редколлегия ағзаларын да йыйып алып, газетаны нисегерәк сығарыу тураһында кәңәшләштек.* Н. Мусин.

**22.** Нимәнелер ижад итеү, ижад емеше булараҡ барлыҡҡа килтереү. *Көй сығарыу. Шиғыр сығарыу. Әкиәт сығарыу.* ■ *Мин был һүҙҙәрҙе рус телен нык ҡына боҙоп, шул арҡала ҡайһы бер көлкө тәғбирҙәр сығарып һөйләй инем.* С. Агиш. *Үткәндәрҙе уйлап күңел тулды, бирсе ҡымыҙ тулы алдырҙы! Кем сығарҙы икән ул йырҙарҙы? Йырҙар мине уйға ҡалдырҙы.* С. Кулибай.

**23.** Кемдеңдер ниндәйҙер яғын асыу, кемдер итеп танытыу. *[Зәйнәп:] Алмаһаң һәм минең исемемде сығарып йөрөр булһаң, мине күреү түгел, хат та яҙма.* М. Ғафури. *Йырлайыҡ, дуҫтар, йырлайыҡ, сығарайыҡ дандарҙы* (Халыҡ йырынан).

**24.** Кем йәки нимә өсөндөр тотоу, сафры итеү. *Аҡса сығарыу. Ҡулдан мал сығарыу.*

**25.** Нимәнелер өҫтө-өҫтөнә һалып берәй нәмә эшләү, төҙөү. *Мөрйә сығарыу.* ■ *Атаҡ, кәйнәм, мейес сығарыу менән өйҙән фирештә ҡасалыр шул. Ана хәҙрәттең .. мейес бар ҙаһа!* Т. Йәнәби.

**26.** Йомортҡа баҫып, себеш булдырыу, килтереү. *Сәрбиямалдың бер оя өйрәге бәпкә сығарҙы.* З. Биишева. *Кеше генәме ни .. ҡоштар ҙа бала сығара.* Ғ. Сәләм.

**27.** Нимәнеңдер сығышын, тәмен һ. б. беләндереү, биреү (аш-һыуға ҡарата). *Аштың тоҙон*

*сығарыу.* ■ *[Сәйле шишмә] һыуы йомшаҡ, сәй сығара.* Р. Низамов.

**28.** Күпмелер күләмдән нимәлер алыу, хасил итеү. *Ике метр тауарҙан күлдәк сығарыу. Өс йомғаҡ йөндән бер кофта сығарыу.*

**29.** Тейешле математик һөҙөмтәне табыу, мәсьәләне һ. б. сисеү. *Мәсьәләне сығарыу. Табышмаҡты сығарыу. Тигеҙләмәне сығарыу.*

**30.** Тикшереү, хәл итеү өсөн тәҡдим итеү. *Мәсьәләне йыйылышҡа сығарыу. Эште судҡа сығарыу.*

**31.** Ниндәйҙер хәлдән икенсе бер хәлгә күсереү. *Артиллеристар үҙ коралдарын яҡшы белә ине. Уларҙың мәргән уты дошманды сығырынан сығарҙы.* Ә. Ихсан. *Мулла .. самауырсыны сыҙамынан сығара яҙыуын шәйләп алды.* Ә. Вахитов.

**32.** Фекер йөрөтөү, тикшереү һ. б. нигеҙендә ниндәйҙер һығымта яһау, ҡарарға килеү. *Һығымта сығарыу.* ■ *Хәмиҙә уларҙың мөңрәү ҙәренән тағы әллә ниндәй мәғәнәләр сығарҙы.* М. Ғафури. *Ҡарар сығарҙылар парторг менән бригадир икәү һөйләшкәс.* Р. Ниғмәти.

**33.** *күсм.* Күңелдән, баштан алып ташлау, юйыу. *Ауылды баштан сығарырға тырышам. [Ә кис] серәкәйҙәр менән һуғышҡанда ауыл иҫкә төшә.* Д. Юлтый.

♦ **Алға кеше сығарыу** эштә, тормошта алдынғылыҡты биреү. *Эш ягына килгәндә лә, алдына кеше сығарғандары юҡ.* Һ. Дәүләтшина. **Башҡа сығарыу** өйләндереп, үҙаллы тормошҡа баҫтырыу. *Күптән инде ике улын, башлы күҙле итеп, башҡа сығарҙылар.* Ғ. Ибраһимов. **Баҫҡан ерҙән ут сығарыу** *кар.* ут [1]. **Кәзә майын сығарыу** *кар.* кәзә. **Ҡаш төҙәтәм тип күҙ сығарыу** *кар.* ҡаш [1]. **Соҡоп сығарыу** 1) әллә ҡасан булғанды (ғәҙәттә кире хәлдә) иҫкә төшөрөү, яңыртыу. *Онотолғанды соҡоп сығарыу;* 2) башҡа ла килмәгәнде уйлап әйтеү. *Тамьян ҡарт елкәһен тырнап ала ла икенсе бер сетерекле һорау уйлап сығара.* А. Ғирфанов.

**СЫҒАРЫШЫУ** *к. урт. кар.* **сығарыу** 1—3, 6—8, 18, 21, 29. *Бурәнә сығарышыу. Мейес сығарышыу.*

**СЫҒАТАЙ: сығатай** теле Урта Азияла ҡулланылған элекке яҙма әҙәби төрки тел.

**СЫҒАТАЙСЫЛЫҠ** *и.* Яҙма тел сифатында сығатай телен ҡулланып, шул ҡанундарын боҙмай һаҡлауҙы яҡлаған йүнәлеш. *[Д. Юлтый] мәҙрәсәле йөрөп, фарсы, сығатай телендә тәрбиә алыуына ҡарамаҫтан, үҙ ижадын гәрәпселек, сығатайсылыҡтан бик саф тота.* Ғ. Амантай.

**СЫҒЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **сығыу** [1] 1—3, 5—8, 13, 32.

**СЫҒЫМ** [1] *и.* **1.** Тотонолған йәки тотонолаҫаҡ аҡса, мал. *Материаль сығым. Сығымдар сметаһы. Төҙөлөш сығымы. Туй сығымы. Хеҙмәт сығымы.* ■ *Халыҡ депутаттары советтарына һайлауҙар үткәреү менән бәйләнгән сығымдар дәүләт иҫәбенә тотола.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**2.** Бухгалтерия кенәгәһендә тотонолған аҡса-мал иҫәбен теркәй торған графа йәки бүлек. *Сығым суммаһы. Сығымға теркәү (яҙыу).*

**3.** Ниндәйҙер шыйыҡ нәмәнең билдәле ваҡыт эсендә сығыу күләме. *Йылғаның һыу сығымы. Ҡоросто күп һыйышлы мейестә иретеү .. материалдың сығымын арттыра.*

**СЫҒЫМ** [2] *с.* Ярһыу булыу сәбәпле тиҙ арыусан (атҡа ҡарата). *Сығым йүгеректең тын-ҡарыуы дүрт биш саҡырымға ғына етә.* С. Кулибай.

**СЫҒЫМЛАНЫУ** *к.* Күп кенә аҡса, мал тотоноп, сығымға [1] (1 мәғ.) юлығыу.

**СЫҒЫМЛЫ** *с.* Ҙур сығым [1] (1 мәғ.) талап иткән. *Сығымлы эш.*

**СЫҒЫНҠЫ** *с.* **1.** Алға сыҡҡан. *Сығынҡы маңлай.* ■ *Әфләтуновтың .. сығынҡы яңаҡлы түңәрәк йөҙө ҡыҙарған.* Ә. Вәли.

**2.** Саманан артыҡ (тоҙ һ. б. ҡарата). *Аштың тоҙо сығынҡы булған. Бәлештең боросо сығынҡы.*

**СЫҒЫНЛАУ** *к. кар.* **сығынсылау.**

**СЫҒЫНСЫ** *с.* **1.** Ҡапыл туҡтап, кире сигеп, ҡарышыусан (атҡа ҡарата). *Тайҙы өйрәтә белмәһәң, сығынсы бер ат була.* Р. Бикбаев.

**2.** *күсм.* Һыңғайға килмәгән, тиҫкәре (кешегә ҡарата). *Сығынсы булыу.*

● *Сығынсы ат тәртә һындыра.* Мәҡәл.

**СЫҒЫНСЫЛАУ** *к.* **1.** Барған ерҙән ҡапыл туҡтап, артҡа сигеп, киреләнеү (атҡа ҡарата). *Командирҙың аты сығынсылап, ситкә тайпыла башланы.* А. Таһиров. *Миндәй кавалеристарға яуҙа бер ни сыҙамай. Тик пегасым, мингән атым, сығынсылап ыҙалай.* Я. Ҡолмой.

**2.** *күсм.* Кеше һыңғайына килмәй, тиҫкәреләнеү. *Бөкрө Ҡолмәт колхозлашыуға ла былай сығынсылап торманы.* Т. Йәнәби. *[Ғабдрахмандың] бисәһе үҙенән ун йәшкә тип әйтерлек олораҡ булған, бәлки, шуғалыр ҙа әле бик сығынсылап бармай.* Д. Исламов.

**СЫҒЫР** *и.* **1.** Аша һалынған, аша үткән бауҙы тартып йәки тотҡаһы менән бороп урағып йөк күтәрә йәки бүтән эш башҡара торған үҙәкле, йомро ҡорал. *Борам сығыры. Көрөс сығыры. Ҡоҙоҡ сығыры.* ■ *Шахтаға барып еткәс, теге кеше мине .. бадъяға ултыртып, сығырҙы әйләндереп түбән төшөрә башланы.* М. Ғафури. *Сығыр шығыр-шоғор килә, һыу сығара баҫыуға.* Ә. Ихсан.

**2.** Йөн, еп сирата, бау, арҡан ишә торған ҡорал. *[Арҡанды] сығыр менән ишкән саҡта, «тәкәне» экрен генә йөрөтәм, сираҡ ишелһен, .. тимен.* Н. Мусин.

**3.** Шәмдең милтәне йөрөтә торған ҡоралы. *Шәмдең сығырын бороу.*

**4.** Тишекле ҡаты ағасҡа орсоҡ һымаҡ итеп яһаған йомшаҡ ағасты ҡыҫтап ҡуйып, бау менән шәп итеп өйрөлтөп, ут ала торған боронғо ҡорал. *Утыбыҙ ҙа сығыр уты ғына.* Ғ. Ишбулатов.

**5.** Баланы атларға өйрәтә торған бейек үрәсәле бәләкәй арба. *Сығыр менән атлатыу.*

**6.** *диал.* Сүре.

♦ **Сығырҙан сығыу** саманан үтеү, нимә эшләгәнде белмәү. *Ишкилде батырға Яздар батырҙы сығарҙылар. Улар көрәшә башлагас, майҙан зыҡ ҡубып, сығырынан сыҡты.* Ш. Шәһәр.

**СЫҒЫРСЫҠ** *и. диал.* Сыйырсыҡ. *Сығырсыҡ ояһы.*

**СЫҒЫУ** [1] (сыҡ*ә*) *к*. **1.** Йорт, бүлмә кеүек нәмәнең эсенән ҡайҙалыр китеү; эстә торған урынды ҡалдырыу. *Бүлмәнән сығыу. Ишектән сығыу. Тәҙрә аша сығыу.* ■ *Сәлимә лә, күңеле үтә нескәләнеп киткән араларҙа, илап алырға соланға сыҡҡылап инә.* Ф. Иҫәнғолов. *Ялбыр йөнлө Алабай йорт-ерҙәрҙе һағалай, сит-ят кеше килә ҡалһа, һаулап сығып абалай.* Ғ. Амантай. / Ниҙеңдер эшмәкәрлегендә ҡатнашыуҙан туҡтау йәки ағзалыҡтан китеү. *Партбюро составынан сығыу. Уйындан сығыу. Һуғыштан сығыу.* / Йәшәгән, эшләгән һ. б. урындан бөтөнләй йәки оҙаҡҡа китеү. *Квартиранан сығыу. Уҡытыуҙан сығыу. Эштән сығыу.* ■ *Өйҙән сыҡҡанға ла байтаҡ ваҡыт үтеп китте.* З. Хисмәтуллин. /Ниндәйҙер уҡыуҙы, уҡыу йортон тамамлау, бөтөрөп китеү. *Курстан сығыу. Мәктәпте тамамлап сығыу. Техникумды тамамлап сығыу.*

**2.** Ҡайҙандыр айырылып китеү, ситкә йүнәлеү. *Ҡапҡанан сығыу.* ■ *Тулыбай .. үҙенең гәҙәте буйынса, өйө артына сығып, балсыҡтан яһалған һикәлтәгә барып ултырҙы.* Ғ. Дәүләтшин. *Ҡыҙым, ватан ошо ул — һин баҫып торған урын, һәм һинең көн һайын иртән уйнарға сыҡҡан юлың.* Р. Ниғмәти. / Ниндәйҙер маҡсатта ҡайҙалыр йүнәлеш алыу, барыу. *Эшкә сығыу. Юлға сығыу. Яуға сығыу.* ■ *Ологатай менән Балагатай .. агай-энеһен эйәртеп Ирәндеккә һунарға сыҡҡан.* Н. Иҙелбай. / Ниндәйҙер бер урынға йәки арауыҡҡа килеү, ҡайҙалыр йәки нимәгәлер аяҡ баҫыу. *Кеше алдына сығыу. Ҡырға килеп сығыу. Сәхнәгә сығыу. Таҡтаға сығыу. Уртаға сығыу. Яланға килеп сығыу.* ■ *Әрәмәне үтеп, туғайға сыҡтыҡ.* Н. Мусин. *Һарыға һабышҡан Зөлхизә .. саф һауала бер аҙ күңелен асҡыһы килеп, ҡырға, тәбиғәт киңлегенә сығыр булған.* Н. Иҙелбай. / Нимәгәләр ҡушылып китеү, ҡатнашыу. *Көрәшкә сығыу. Ярышҡа сығыу.*

**3.** Нимәнеләр киҫеп үтеү, аша хәрәкәт итеү. *Йөҙөп сығыу. Йылғаны киҫеп сығыу. Урманды сығыу. Үрҙе сығыу.* ■ *[Ғаян:] Шпиондарҙың сикте сығырға маташыуы буранлы йәки ҡаты томанлы көндәрҙә була.* Б. Дим. / Кемдер, нимәлер алдынан үтеү, юл алыу. *Ололар алдынан сыҡҡанда, ал менән сыҡ, ҡыҙыҡай* (Туй йырынан).

**4.** Бер яҡтан икенсе яҡҡа күсеү. *Ҡыҙылдар яғына сығыу. Ярлылар яғына сығыу.* / Дин алмаштырыу, икенсе дингә күсеү. *Мосолманлыҡтан христианлыҡҡа сығыу.*

**5.** Ҡайҙалыр бейеккә, юғарыға үрләү, күтәрелеү. *Түбәгә сығыу. Ярға сығыу.* ■ *Иренеп күккә сыҡҡан күк Ирәмәл.* Х. Ғәбитов. / Нимәлер горизонт өҫтөнә күтәрелеү, ҡалҡыу. *Йәйге оҙон көндөң ҡояшы сығып өлгөрмәгән булһа ла, Ирәндек тауы уның нурына битлегеп ҡуйған.* Ғ. Дәүләтшин. *Ҡояш сыҡты. Үҙ ҡабығын ҡарышлауыҡ сыҡты тишеп.* Р. Бикбаев. / Борҡоп, ағым-ағым булып өҫкә күтәрелеү. *Паровоз ҡаҙанынан пар сыға.* ■ *Һарайҙан төтөн сыға, тәмле аш еҫе танауға бәрелә.* Д. Юлтый.

**6.** Ярышып эшләп ниндәйҙер урын алыу, яулау. *Ярышта беренсе урынға сығыу.* ■ *Эй, Мөхитдин, уҙам тип, алдыңа ҡарға сыға.* Ш. Бабич. / Эштә, тормошта ниндәйҙер яңы шарттарға юлығыу, эшләй йәки йәшәй башлау. *Ирекә сығыу. Иркенгә сығыу. Отставкаға сығыу. Пенсияға сығыу. Рәхәткә сығыу.* / Ниндәйҙер баһа алыу, шул баһаға тиң һөҙөмтә менән бөтөү. *Дөрөҫкә сығыу. Насарға сығыу. Ялғанға сығыу.* ■ *Беҙ һеҙҙе көттөк, килер тип өмөт иттек, ләкин көтөүебеҙ бушҡа сыҡты.* Д. Юлтый. *Егет .. урамда бик күп йорттарҙың юҡҡа сыҡҡанын күрҙе.* Ғ. Ибраһимов.

**7.** Ниндәйҙер бер үҫеш осорона етеү; күпмелер йәш сиген үтеү. *Алтмышҡа сығыу.* ■ *Балалыҡтан сығып, яҡшы уҡ егет булып килгән ваҡыт ине.* Т. Йәнәби. / Йыл миҙгелдәренең береһенән икенсеһенә күсеү. *Йәйгә сығыу. Яҙға сығыу.* ■ *Көҙ көнө уҡ орлоҡтарҙың сығышын .. тикшерткәйнеләр, ләкин ҡыш сыҡҡансы .. хәлдең үҙгәреүе бар бит.* Б. Бикбай. / Билдәләнгән ваҡыттың аҙағы, ахыры етеп үтеү. *Билеттың срогы сығыу. Командировканың срогы сығып бара.*

**8.** Нимәнеңдер һуңғы сигенә тиклем етеү, үтеп бөтөү. *Бәхәстең осона сығыу. Эштең аҙағына сығыу.* ■ *Мистерҙың .. байлығының осона сыға алмай һис кем.* Ф. Иҫәнғолов. / Ниндәйҙер дини йоланы һ. б. атҡарыу, уҡып үткәреү. *Мин атайымдың ауыр хәлдә икәнен, ясин сығып ҡалыуҙарын ишетеп, нык ҡайғырҙым.* М. Ғафури.

**9.** Нимәнеңдер эсенән икенсе бер нәмә һурып, тартып алыныу. *Мейестән яңы сыҡҡан икмәк.* /Нимәлер бушап, ҡубып йәки һурылып төшөү. *Тәгәрмәс күсәренән сыҡҡан.* ■ *Бүлманы был нәмәнән дә, кәһәр һуҡҡан, әллә һынған, әллә берәй сөйө сыҡҡан.* М. Ғафури.

**10.** Ҡайҙандыр, кемдән йәки нимәнәндер башланғыс алыу. *Ауылдан сыҡҡан артист. Ярлы ғаиләнәни сыҡҡан кеше.* ■ *— Юҡ, «Урал» [һуҙе] рустарҙан сыҡҡан исем түгел.* Д. Бураҡаев. / Ҡайҙандыр, кемдән йәки нимәнәндер нигеҙ алыу, таяныу. *Закондан сығып эш итеү. Логиканан сығып иҫбатлау. Яңы мәғлүмәттәрҙән сығыу.*

**11.** Ниндәйҙер бер сығанаҡтан тирә-яҡҡа таралыу (еҫкә ҡарата). *Өйҙә еҫ сыҡҡан.* ■ *Зөләйха туташ, был кисеттан үҙеңдең еҫең сығып тора икән.* Т. Йәнәби.

**12.** Ҡайҙалыр хасил булып яңғырау, таралыу (тауыш, өнгә ҡарата). *Йырсының тауышы көслө сыға. Ҡыңғырау тауышы сыҡты.* / Әйтелеү, ишетелеү (һүҙ, хәбәргә ҡарата). *Сәгиҙә балалар ауыҙынан сыҡҡан һүҙҙең асылына төшөнөргә тырышты.* М. Тажи.

**13.** Ниндәйҙер хәлдән арыныу, ҡотолоу. *Ғазаптан сығыу. Һәләкәттән сығыу.* ■ *Бөгөн беҙҙә бөтә ҡыйынлыҡтан сығыу юлын таба кешеләр.* Х. Ҡунаҡбай.

**14.** Ҡайҙандыр эстән, төптән тышҡа сығыу; аҫтан тибеү. *Ағып сығыу. Маңлайға тир сығыу. Шишмә сығыу.* ■ *Тимерғәле ҡарт тойғолар тулҡыны эсендә һүҙһеҙ ҡалған, тамағы төбөнә күҙенән сығырға ынтылған йәштәре төйнәлгән.* Т. Хәйбуллин. *Уның [командирҙың] яурынынан атылып сыҡты ҡара, ҡуйы ҡан.* Р. Ниғмәти. /Үҙ сигенән артылыу, ташыу (һыуға, йылғаға ҡарата).

**15.** Тәндә ниндәйҙер бер нәмә үҫеү, ҡалҡыу.

*Күҙенә арпа сыҡҡан. Сикан сығыу. Шешек сығыу.* ■ *(Хужагәле:] Ә тимен мин һеҙгә, телегеҙгә тилсә сыҡҡыры нәмәләр. .. Ниңә өндәшмәйһегеҙ?* С. Агиш. / Ниндәйҙер ерлектән үҫеп күренеү, барлыҡҡа килеү. *Мөгөҙ сығыу. Мыйыҡ сығыу. Теш сығыу. Себештең ҡанаты сыҡҡан.* / Тәбиғи хәленән ҡаймығып йәки бүтән сәбәптән ситкә тайыу, урынынан күсеү. *Арҡаһы сыҡҡан. Ҡулының быуыны сыҡҡан.* / Эске ағза ҡуҙғалып тышҡа тибеү, ҡалҡыу. *Кендеге сыҡҡан. Күҙе сыҡҡан.* / Үҫеп, өҫкә ҡалҡыу (үҫемлектәргә ҡарата). *Йәшел үлән сыҡты. Орлоҡ шытып сыҡты.* ■ *[Сәскән] арыш сыҡты ла инде.* Ғ. Ғүмәр.

**16.** Нимәнеңдер өҫтөндә күренеп башҡа нәмә барлыҡҡа килеү. *Биткә ҡыҙыл тап сығыу.* ■ *Аҡназар аҙ-маҙлап ауыҙына аш ала башлай, йөҙөнә ҡыҙыллыҡ сыға* (Әкиәттән). / Ниндәйҙер кисереш күҙгә күренеп сағылыу. *Асыуы йөҙөнә сыҡҡан. Шатлығы тышҡа сыҡҡан.* ■ *Емештең ярһыуы, тулҡынланыуы төҫөнә сыҡты.* З. Биишева.

**17.** Ниндәйҙер сифатҡа эйә булыу. *Рәт сығыу. Һинән бер эш тә сыҡмаҫ.* ■ *Тора-бара бөтөнләй рәтләнеп етһә, унан [Фәхриҙән] тау емереп эшләй торған колхозсы сығыр.* Б. Бикбай. *Музыкаға өйрәткән кешеләр Мәрйәмдән ҙур композитор сығыр тигәйнеләр.* Д. Юлтый.

**18.** Нимәнеңдер сифаты, эшләнеү рәүеше еренә етеү йәки килеп етмәү. *Асыҡ сығыу. Насар сығыу. Яҡшы сығыу.* ■ *Ғ. Туҡаев башҡарыуында колхоз шофёры, «мотор кешеһе» Шаһи образы шәп сыға.* Р. Ниғмәти. *[Балалар]: — Ҡара, әсәй, ёлкабыҙ матур сыҡты бит,— тиҙәр.* Ғ. Сәләм.

**19.** Нимәнеңдер һөҙөмтәһе булып барлыҡҡа килеү, ғыуыу. *Тоҡҡарлыҡ сығыу. Төрлөсә килеп сығыу.* ■ *Нишләйем һуң башлы көлтә сыҡманы шул гел генә: нимә сәскән халҡыбыҙ — тик мин шуны урҙым ғына.* Ш. Бабич. / Ниндәйҙер эш һ. б. һөҙөмтәһендә берәй хәл тыуыу. *Хәҙерге совет әҙәбиәте ғилемендә һәм әҙәби тәнҡит өлкәһендә социалистик реализм хаҡында .. әленән-әле ижади бәхәстәр сыҡҡылап тора.* Ғ. Хөсәйенов. / Нимәләр булыу, булып тороу; табылыу. *Файҙа сығыу. Эш сығыу.* ■ *Тирәяҡта дан тоткан был һунарсы [Аҡназар]. Уға тиңдәш сыҡмаған* (Әкиәттән). / Кемдер булып танылыу. *[Мәсем хан — Һәүбәнгә:] Дәртең булһа, катнаш майҙанымда, батыр сыҡһаң, ҙур дан алырһың.* С. Мифтахов.

**20.** Ҡайҙандыр нимәләр табылыу. *Өйөнән бер нәмә лә сыҡманы.* / Ер аҫтынан табылыу, табып алыныу (файҙалы ҡаҙылмаларға ҡарата). *Тәбиғи газ сыҡҡан урын. Скважинанан нефть сыға.*

**21.** Нимәләр ҡулға эләгеү, тейеү; нимәгәләр юлығыу. *Отош сығыу. Миңә лә өлөш сыҡты.* / Нимәнеңдер йөҙөнән башҡа нәмәгә күсеү, йоғоу. *Мейестең аҡбалсығы сыға. Таяҡтың буяуы ҡулға сыға.*

**22.** Нимәләр башланып китеү, күтәрелеү, ҡубыу (ел-дауылға, болаға һ. б. ҡарата). *Буран сыҡты. Тауыш сыҡҡан. Яу сыҡты.* ■ *Яҙғы көн ни — ярты аҡыл, .. төнөн буран сыҡты ла китте.* Р. Солтангәрәев. *Кешеләр уҙамандан ҡыуышып, ут сыҡҡан яҡҡа йүгерешә башланы.* Ғ. Дәүләтшин.

**23.** Ниндәйҙер эш тормошҡа ашырылыу, ғәмәлгә инеү. *Бойороҡ сыҡҡан. Декрет сыҡҡан. Ҡарар сыҡҡан. Яңы фильм сыҡҡан.* ■ *«Һалдаттарға — ҡайтырға» тигән приказ сыҡты.* М. Ғафури. *Баяр утарында әленән-әле бер хәл сыға торған.* М. Тажи. / Баҫылыу, баҫылып донъя күреү. *Газета сыҡҡан. Китап сыҡҡан.*

**24.** Ижад ителеү, ижад емеше булып барлыҡҡа килеү. *Яңы йыр сыҡҡан.*

**25.** Йәмәғәтселеккә билдәле булыу, танылыу (хәбәргә һ. б. ҡарата). *Даны сыҡҡан.* ■ *[Шаһнияз:] Һин, Ғәндәлип, ҡомһоҙлоғоң менән тирә-йүнгә яманатың сыҡҡан кеше.* Ә. Мирзаһитов. *Газеталарҙа исеме сыҡҡан ҡулаҡ [активисты] бөтөрмәксе булған шул ерҙә.* Ғ. Мәсғүт.

**26.** Кем йәки нимә өсөндөр тотолоу, сарыф ителеү (аҡса, малға һ. б. ҡарата). *Аҡса сығыу. Ҡулдан мал сығыу.* ■ *— Сығып барған аҡсаң бар икән! — тине Ибраһим ағай.* Д. Исламов.

**27.** Иргә, кейәүгә ҡатын булып барыу, тормош ҡороу. *Иргә сығыу.* ■ *Мине уға [атайығыҙға] бирергә риза булманылар. .. Бер төндө ҡастым да сыҡтым.* Ғ. Хәйри.

**28.** Йомортҡанан яралыу, донъяға килеү (себешкә ҡарата). *Яңы сыҡҡан һары себеш һымаҡ, таң беленә.* К. Кинйәбулатова.

**29.** Нимәнеңдер сығышы, тәме, таты беленеү (аш-һыуға ҡарата). *Аштың тоҙо сыҡмаған. Сәй яҡшы сыҡҡан.*

**30.** Күпмеләр күләмдән нимәләр алыныу, хасил булыу. *Ике метр тауарҙан бер күлдәк сыға. Түтәлдән ун күнәк ҡыяр сыҡты.* / Ниндәйҙер юл менән эшкәртеп алыныу, айыртылыу. *Гектарынан егерме дүрт центнер иген сыҡты. Өс литр һөттән бер стакан ҡаймаҡ сыҡты.*

**31.** Тейешле математик һөҙөмтә биреү, мәсьәлә һ. б. сиселеү. *Мәсьәлә сыҡты. Тигеҙләмә сыҡмай.*

**32.** Эшләнәсәк эштән, мәсьәләнән һ. б. ситкә китеү, ситләшеү. *Теманан сығыу.*

**33.** Булған ерҙән таралып, юҡҡа әйләнеү. *Баштан сығыу. Иҫтән сығыу. Уйҙан сыҡмай.*

**34.** Хәрәкәт мәғәнәһендәге *-п* хәл ҡылымынан һуң килеп, ниәт һәм ваҡыттың ныҡлап тәғәйенләнмәгәнен белдерә. *[Ямал:] Әй, мөғәллимә, беҙгә барып сыҡ, һөйләшеп ултырырбыҙ.* М. Тажи. *Йөрөй торғас, был егет ҙур бер йылғаға килеп сыға* (Әкиәттән).

**35.** Төп мәғәнәне йөкмәгән *-п* хәл ҡылымына теркәлеп, эш-хәрәкәттең баштан-аҙаҡ тулы башҡарылышын белдерә. *Айҡап сығыу. Ҡарап сығыу. Күрешеп сығыу. Уйлап сығыу. Уҡып сығыу. Һанап сығыу.* ■ *Ҡаҙылған ерҙе ҡул тырмаһы менән тырматып сыҡтылар, ти* (Әкиәттән).

**36.** Төп мәғәнәне йөкмәгән *-п* хәл ҡылымына теркәлеп, эш-хәрәкәттең һөҙөмтәле аҙағын белдерә. *Бешеп сығыу. Өҙөлөп сығыу.* ■ *Таганга аҫылған баҡырса ҡайнап сыҡты.* Я. Хамматов.

**37.** Төп мәғәнәне йөкмәгән *-п* хәл ҡылымына теркәлеп, эш-хәрәкттең ниндәйҙер ваҡыт араһында дауам иткәнен белдерә. *Ундағы [йортта-*

*ғы] әйберҙәр боҙолмаһын өсөн, кыш буйы тиккә ягып сығалар.* М. Ғафури.

**38.** Оҡшатыу һүҙенән яһалған *-лыға* формаһындағы ҡылымдарға теркәлеп, шул һүҙ менән бирелгән эш-хәрәкәттең дауамлы, интенсив булыуын белдерә. *Дағырлыға сығыу. Лабырлыға сығыу.*

♦ **Алдын сығыу** эштә, ярышта һ. б. еңеү, өҫтөнлөк яулау. *[Сәпкә ук атыу ярышында] һайылмыш буйынан Айбулат, Юшатырҙан Ҡәҙергол исемле ике егет алдын сыҡкан.* Ғ. Сөләймәнов. **Барып сығыу** эш һ. б. уйлағанса башҡарылыу, ғәмәлгә килеү, үтәлеү. *Төрмәләге каторжандарҙы беҙ ҡоткарҙыҡ. .. Эш барып сыҡты, тик һиҙеп ҡалдылар.* Ә. Чаныш. **Башҡа сығыу** *кар.* **башҡа** [1]1. *Егеттәрең, килендәрең шатлыҡ-бәхеткә сумып, башка сығып йыйылғандар теүәл бер урам булып.* Ә. Атнабаев. **Баш сыҡмау** *кар.* **баш. Булып сығыу** эш-хәлдең нисек йәки ни булыуы асыҡланыу. *Полковник урта йәштәрҙәге ир булып сыҡты.* Н. Мусин. **Донъяға сығыу** *кар.* **донъя. Йөрәк сығыу** *кар.* **йөрәк. Йән сығыу** 1) арманһыҙ булыу, хәлдән тайыу. *Ҡырағай далала блиндаж яһай-яһай йәнең сығыр.* Ә. Бикчәнтәев; 2) вафат булыу, үлеү. *Мин кош янына барып еткәндә, уның йәне сыҡкан ине инде.* М. Сәғитов. **Кешелектән сығыу** *кар.* **кешелек** [1]. **Күҙ сығыу** *кар.* **күҙ. Осона сығыу** *кар.* **ос. Осо сығыу** *кар.* **ос. Өҫкә сығыу** *кар.* **өҫ. Сиктән сығыу** ныҡ ярһыу, ҡотороу. *Нәфсе- шайтан кергәс, инсан донъяһы аҙҙы, туҙҙы, сыҡты сиктән һәммәһе.* Ш. Бабич. **Тел сығыу** *кар.* **тел** 2. **Теш сығыу** *кар.* **теш** [1]. **Тәртәнән сығыу** *кар.* **тәртә. Һүҙҙән сыҡмау** *кар.* **һүҙ. Эш. сығыу** *кар.* **эш. Эштән сығыу** *кар.* **эш. Эштән сыҡкан** *кар.* **эш. Юлдан сығыу** *кар.* **юл** [1].

● *Инерендән элек сығырыңды уйла.* Мәҡәл. *Иртә сыҡкан юл алыр.* Әйтем. *Ҡара кешенең тире сыҡкансы, һары кешенең йәне сығыр.* Мәҡәл.

**СЫҒЫУ** [2] *и.* **1.** Яҙ көнө аттың һыртында ваҡ-ваҡ ҡына булып тишелеп, ҡанап торған боҙоҡ. *Аттың һыртына сығыу сыҡкан.*

**2.** *диал.* Һытҡы. *Сикәгеҙгә әллә берәй сығыу сыҡкайнымы, бабай? — тип һораным.* С. Кулибай.

**СЫҒЫУЛАУ** *к.* **1.** Яҙ көнө аттың һыртынан ваҡ-ваҡ ҡына булып тишелеп, ҡан һарҡыу. *Ат сығыулаған.*

**2.** *диал.* Һытҡылау. *Бите сығыулаған.*

**СЫҒЫШ** *и.* **1.** Тыумыш буйынса билдәле бер урын-ергә, ниндәйҙер милләткә, синфи ҡатлауға һ. б. ҡарата булған бәйләнеш. *Минең социаль сығыш шулай: атайым ата-әсәнән бик йәшләй ҡалып, ун ике йылдан артыҡ көтөү көткән, әсәйем ауылдың иң ярлы семьяһында тыуып, кейәүгә сыҡканса кешелә хеҙмәт иткән.* Т. Йәнәби. *БАССР граждандары сығышына, социаль һәм мөлкәт хәленә .. һ. б. шарттарға ҡарамаҫтан, закон алдында тиң хоҡуҡлы.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. / Нимәнеңдер барлыҡҡа килеү, тыуыу сығанағы. *Һуңғы ваҡытта АҠШ ғалимдары был януарҙы яңынан иҫкә төшөрҙөләр һәм уның сығышы менән ҡыҙыҡһындылар.* Д. Бураҡаев.

**2.** Кеше алдына сығып һөйләгән һүҙ; телмәр. *Кешенең сығышын тыңлау. Сығыш яһау.* ■ *Ҡарттың сығышы залды .. дәррәү ҡуҙғатып ҡуйҙы.* М. Тажи. *Юлия Мурзиндың ундағы [губерна съезындағы] ялҡынлы сығыштарын һоҡланып тыңланы.* Һ. Дәүләтшина. / Газета--журналда баҫылған хәбәр. *Ғазетала сығыш яһау.* ■ *[Ғәләү] уҫал ғына мәҡәләләр менән сығыш яһап, үҙен танытҡан.* Б. Бикбай.

**3.** Сәхнәлә башҡарылған төрлө уйын, тамаша. *Парижда буласаҡ сығышына [ҡурайсы] Йомабай [ныҡ] әҙерләнә.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 18 ноябрь.

**4.** Нимәлер даулап сыҡҡан күмәк хәрәкәт. *Ҡоралды сығыш.* ■ *Милек хужаһы булған синыфтар .. төрлө урында контрреволюцион сығыш яһай.* «Совет Башкоростанының ун йылы», 1929.

**5.** Орлоҡтоң шытыу һәләте. *Орлоҡтоң сығышын тикшереү.* ■ *Теүәлбай:] Әптерахмандар эшләгән Ҡолдор буйында сүп күп күренә. [Игендең] сығышы ла бер урында ҡуйы, бер урында һирәк.* С. Агиш.

♦ **Ҡояш сығышы** *кар.* **көнсығыш** 1.

**СЫҒЫШЛЫ** *с.* **1.** Шытыу кимәле яҡшы (орлоҡҡа ҡарата). *Сығышлы орлоҡ.*

**2.** Тәме, төҫө яҡшы сыҡҡан (сәй-шәкәргә һ. б. ҡарата). *Сығышлы сәй.* ■ *Их, байҙың сәйе лә сәйе шул! Иң сығышлыһы, иң ҡыйбатлыһы — йөҙ ҙә бишенсе фамильнай сәй!* Я. Хамматов.

**СЫҒЫШҺЫҘ** [1] *с.* **1.** Шытыу кимәле насар (орлоҡҡа ҡарата). *Сығышһыҙ орлоҡ.*

**2.** Тәме, төҫө насар сыҡҡан (сәй-шәкәргә һ. б. ҡарата). *Сығышһыҙ сәй.*

**СЫҒЫШҺЫҘ** [2] *с. һөйл.* Кешегә нәмә биреүгә ҡаты; һаран. *Сығышһыҙ әҙәм.*

**СЫҘАМ** I *с.* **1.** Ихтыяр көсө менән ҡыйынлыҡтарҙы үткәреүгә һәләтле; түҙем. *Сыҙам кеше.* ■ *Беҙҙең арала иң сыҙам, иң ныҡ .. кеше. — Буранбай. Беҙ уны алдан төшөрҙөк.* Д. Юлтый. *[Дилбәр Мәстүрәгә:] Һин сыҙамһың, апай. Һин ниндәй сыҙамһың! Минең сыҙам булғым килмәй.* М. Кәрим.

**2.** Нимәнелер оҙаҡ, ныҡышмалы эшләүгә һәләтле, ҡыйынлыҡҡа бирешеп бармаған. *Ватан һуғышының ауыр юлдарын үткән сыҙам һәм батыр йәйәүлене беҙ хаҡлы рәүештә данлайбыҙ.* Х. Кәрим.

**3.** Тышҡы тәьҫиргә бик үк бирешеп бармаған. *Коррозияға сыҙам тимер. Ҡоролоҡҡа сыҙам үҫемлек. Һыуыҡҡа сыҙам алма.*

II *и.* **1.** Ихтыяр көсө менән ҡыйынлыҡтарҙы һ. б. үткәрә алыу һәләте; түҙемлек, түҙем. *Сыҙам ҡалмай башлау.* ■ *Минең сыҙамым тағы ла емерелде. [Эргәмдәге] иптәштең ҡабырғаһына төрттөм: — Нисек һөйләй, ә?* Д. Юлтый. *Урмандарға сыҡтым һағыныуҙан сыҙамдарым бөткән саҡтарҙа.* М. Кәрим.

**2.** Нимәнелер оҙаҡ, ныҡышмалы башҡарыу һәләте. *[Ҡормой:] Сыҙамдың да сиге бар ул. Үҙәгемә үтә башлағас, тәүәккәләп ҡорал менән сыҡтым.* Б. Бикбай.

**СЫҘАМЛЫ** *с. кар.* **сыҙам** I. *Ҡоролоҡҡа сыҙамлы үҫемлек. Оҙаҡҡа сыҙамлы. Сыҙамлы*

*кеше. Сыҙамлы булыу.* ■ *[Антон:] Моментты көтә белергә, сыҙамлы була алырға кәрәк.* Р. Ниғмәти.

**СЫҘАМЛЫЛЫҠ** *и.* Ҡыйынлыҡтарҙы зарланмай, бер нәмәгә бирешмәй үткәрә алыу һәләте; сыҙам булыу һәләте. *Сәгиҙә менән Гөлнур күпме генә тыныс булырға тырышһалар ҙа сыҙамлылыҡтарын юғалттылар, .. бер-береһен ҡосаҡлап илашып алдылар.* М. Тажи. *[Зөһрә йырлай:] Әшсе диктатура өсөн көрәшкәндә сыҙамлылыҡ кәрәк һәр эштә.* А. Таһиров.

**СЫҘАМҺЫҘ** *с.* **1.** Төрлө ҡыйынлыҡтарҙы тыныс үткәреүгә һәләтһеҙ; сыҙамы булмаған, етмәгән, сыҙамы самалы; түҙемһеҙ. *Сыҙамһыҙ кеше. Сыҙамһыҙ булыу.*

**2.** Оҙаҡ, ныҡышмалы эшкә һәләтһеҙ, бирешеп барыусан; сабырһыҙ. *Көтөп тороуға сыҙамһыҙ. Эшкә сыҙамһыҙ. Сыҙамһыҙ тотоу.*

**3.** Тышҡы тәьҫиргә бирешеп барған, түҙмәгән. *Коррозияға сыҙамһыҙ тимер. Ҡоролоҡҡа сыҙамһыҙ үҫемлек. Ҡояшҡа сыҙамһыҙ тауар. Ташҡа сыҙамһыҙ аяҡ кейеме. Һыуыҡҡа сыҙамһыҙ алма.*

**СЫҘАМҺЫҘЛАНЫУ** *ҡ.* Үҙеңде сыҙамһыҙ (1, 2 мәғ.) тотоу; түҙемһеҙләнеү.— *Шунан ни булды инде, ағай? — тине йәнә малай, сыҙамһыҙланып.* З. Ураҡсин.

**СЫҘАМҺЫҘЛЫҠ** *и.* Сыҙамһыҙ хәл. *Ҡоролоҡҡа сыҙамһыҙлыҡ. Сыҙамһыҙлыҡ күрһәтеү. Сыҙамһыҙлыҡ менән көтөү.* ■ *[Фәхри:] Быҙауҙарҙың һыуыҡҡа сыҙамһыҙлығын һәр крәҫтиән яҡшы белә инде.* Б. Бикбай.

**СЫҘАТЫУ** *ҡ.* **1.** *гәҙәттә юкл.* Ниндәйҙер ҡыйын хәлгә түҙҙереү. *Эҫе төшкәс, малды күгәүен сыҙатмай.* ■ *Аяныс хәл Аҡбалуан ағайҙы ла сыҙатманы, ул .. итәк салғыйын ҡайырып күҙенән мөлдөрәп тәгәрәгән йәштәрен һөрт[тө].* Т. Хәйбуллин.

**2.** Күпмелер ваҡытҡа еткереү. *Харап итерҙәр уны [атты], аҙнаға ла сыҙатмаҫтар.* Б. Бикбай.

**СЫҘАУ** *ҡ.* **1.** Ауырлыҡты, ҡыйынлыҡты зарланмай, бер нәмәгә бирешмәй үткәреү; түҙеү. *Аслыҡҡа сыҙау. Ауыртыуға сыҙамау. Хурлыҡҡа сыҙау. Һыуыҡҡа сыҙау. Әҙәм сыҙамаҫ. Сыҙар хәл ҡалманы.* ■ *[Һыйырҙар] көндөң эҫелегенә сыҙамай безәкәйләп, көтөүҙән ҡаса.* Ғ. Дәүләтшин. *[Әхмәтсафа] бисәһенең әрләүенә тешен ҡыҫып .. сыҙай.* Д. Исламов.

**2.** Үҙ-үҙеңде тотоу, тыйыу; сабыр булыу, түҙеү. *Саҡ сыҙап тороу. Сыҙамай, көлөп ебәреү.* ■ *Ғүмерендә эттең илағанын ишетмәгән Шафиҡ үҙе лә сыҙаманы, күңеле тулды.* Я. Хамматов. *Ҡуш йөрәкле егет, көслө йәнле, сыҙаманы батыр Салауат.* Х. Ғәбитов.

**3.** Нимәнелер сабырлыҡ менән көтөү; түҙеү. *Яҙға тиклем сыҙап торорға, .. уҡыу бөткәс, .. икәүләп барырға тигән ҡарарға килделәр.* М. Тажи. *[Театрҙы] ни тиклем ташлап китергә теләһәм дә, сыҙаным, көтәйем тинем. Алда, бәлки, ҡыҙыҡлыраҡтары булыр.* С. Агиш.

**4.** Үҙенең сифатын, ныҡлығын һ. б. күпмелер һаҡлау, күпмелер ваҡытҡа еткереү. *Ҡарағас оҙаҡҡа сыҙай.* ■ *Иҫке тиһәң дә, ныҡ әле ул, ике ҡышҡа сыҙар.* Б. Бикбай. *Беҙҙең егеттәргә эш сыҙаймы ни!* Н. Мусин.

**5.** *юкл.* Туйып кинәнеү, ҡотороу. *Майға сыҙай алмай.* ■ *[Сурагол:] Әкбәр доверенный .. ер һатыуҙан йыйылған байлығына сыҙай алмай йөрө[й].* Т. Хәйбуллин.

♦ **Сыҙап ҡына тор** бик киҫкен бер хәлгә ҡарата әйтелә. *Инде ул туҙа башлаһа — сыҙап ҡына тор.* Б. Бикбай.

● *Бер йылға ҡуя тиреһе лә сыҙаған.* Әйтем. *Сабырлы сыҙар, сабырһыҙ илар.* Әйтем. *Хөрлөккә сыҙамаған хурлыҡҡа тарыған.* Әйтем.

**СЫҘАШЫУ** *ҡ.* **1.** Үҙ-ара бер-береңә сыҙау. *Күршеһе менән сыҙаша алмай. Иптәштәре менән бер ҙә сыҙаша алмай.*

**2.** *һөйл. ҡар.* **сыҙау** 1, 5. *Ауыртыуға сыҙаша алмау. Байлығына сыҙаша алмау. Һимеҙлеккә сыҙаша алмау.* ■ *Берәү ҙә урынында ултырып сыҙаша алмай. Әле беребеҙ, әле икенсебеҙ, кухня тирәһенә барып .. әйләнәбеҙ.* Д. Юлтый.

**СЫҘЫҠ** *и. диал.* Итәккә баҫҡан таҫма.

**СЫЖ** *оҡш.* Утҡа, эҫе нәмәгә һыу, май төшкәндә, нимәлер ҡапыл атылып осҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Сыж итеү.*

**СЫЖЛАТЫУ** *ҡ.* Сыж иттереү, сыж-сыж килтереү. *Хужа бисә тора һалып самауырын сыжлатты.* Т. Йәнәби. *Газ тоҡандырып ебәреп, сәй ҡуйҙым да табаға сыжлатып йомортҡа һыта башланым.* Ф. Иҫәнғолов.

**СЫЖЛАУ** *ҡ.* Сыж итеү, сыж-сыж килеү. *Сыжлап шырпы тоҡанды.* ■ *Ғәйшә әбей сыжлап торған самауыр килтереп ултыртты.* З. Хисмәтуллин. *Өйрәк духовкала .. сыжлап ҡурылып та өлгөрҙө.* Ф. Иҫәнғолов.

**СЫЖ-СЫЖ, сыж да сыж** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат сыж иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сыж-сыж итеү. Сыж да сыж килеү.*

**СЫЖЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Сыж-сыж иттереү, сыж-сыж килтереү.— *Әсәң көн дә иртән сыжылдатып ҡоймаҡ ҡоя.* Р. Ниғмәти. *Әйҙә, ҡуҙғалдыҡ, еңгәң дә самауырын сыжылдатып, көтә-көтә көтөк булып бөткәндер.* В. Нафиҡов.

**СЫЖЫЛДАУ** *ҡ.* Сыж-сыж итеү, сыж-сыж килеү. *Ут .. көслө. Сей яҡҡаларҙың [осонан] сыжылдап һыу тамып тора.* Ғ. Әмири. *Мейес өҫтөндә котелок һәм сәйнүктәр сыжылдап ҡайнап ултыра.* А. Карнай.

**СЫЖЫМ** *и. диал.* Сым. *Телефон сыжымы.*

**СЫЙ**[1] *и. диал.* Сыйҙым.

**СЫЙ**[2] *оҡш.* Әсе тауышты белдергән һүҙ. *Сый итеп ҡалыу. Сый итеп осоп китеү.*

**СЫЙБАЛА** *и. диал.* Селбәрә.

**СЫЙҒЫЛАУ** *ҡ.* Тегеләй-былай һыҙыу. *Ҡағыҙҙы сәйғылау. Сыйғылап ташлау.*

**СЫЙҒЫС**[1] *и. ҡар.* **һыҙғыс** 1, 2. *Сыйғыс менән һыҙыу.*

**СЫЙҒЫС**[2] *и. диал. ҡар.* **шырпы**[1].

**СЫЙҒЫСЛАНЫУ** *ҡ. ҡөс.* **1.** Арҡыс-торҡос, тегеләй ҙә былай һыҙылыу, һыҙылып бөтөү. *Ҡағыҙҙың ике яғы ла сыйғысланған, яҙыуын танырлыҡ түгел.*

**2.** Нисек етте шулай яҙылыу. *Ҡағыҙға ҡәләм менән ошо һүҙҙәр сыйғысланғайны: «Уландарым, ҡыҙҙарым, һау булып тороғоҙ. Мине юғалтмағыҙ, эҙләмәгеҙ.* Й. Солтанов.

**СЫЙҒЫСЛАУ** *ҡ. ҡөс.* **1.** Арҡыс-торҡос, тегеләй ҙә былай һыҙғылау. *Әптерәй сыбыҡ осо*

*менән епшек карға нимәлер сыйғысла[й].* Й. Солтанов.

**2.** Нисек етте шулай яҙыу. *Сыйғыслап кына хат яҙған.*

**СЫЙҘЫМ** *и.* Күҙгә һыу өҫтөндәге туңа башлаған кар катыш боҙ; шыя. *Күршебеҙ Хисам карт .. яҙ көнө Ташлыйылғаның боҙо куҙғалып киткәндән алып, күҙгә сыйҙымдар тоташкансы, [балык тотоп] һыу буйынан кайтмаҫ ине.* М. Тажи. *Һуңғы кыр каҙҙары китте, һуңғы япрак койолдо. Кисә сыйҙым килә ине, бөгөн тоткан Иҙелде.* Р. Бикбаев.

**СЫЙҘЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **сыйыу.** *Исемлектән сыйҙырыу. Битте сыйҙырыу.* ■ *Тимерйән кулының һыртын нимәгәлер сыйҙырған, йәрәхәтенән кан һыркырап, кейемен буяй.* Ш. Янбаев.

**СЫЙК** *окш.* Нимәлер ышкылғанда, кош кыскырғанда һ. б. сыккан капыл өҙөлгән нәҙек әсе тауышты белдергән һүҙ. *Кояш байып, бәхет кошо сыйк итеп кыскырғас, ишегеңде ас, ул сығып китер* (Әкиәттән).

**СЫЙК-СЫЙК, сыйк та сыйк** *окш.* Кабат-кабат сыйк иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сыйк-сыйк итеү. Сыйк-сыйк килеү.*

**СЫЙКЫЛДАТЫУ** *к.* Сыйк-сыйк иттереү, сыйк-сыйк килтереү. *Сыйкылдатып кыскыртыу.*

**СЫЙКЫЛДАУ** *к.* Сыйк-сыйк итеү, сыйк-сыйк килеү. *Һабан тәгәрмәстәре сыйкылдаған, ат бышкырған .. тауыш ишетелде.* Б. Бикбай.

**СЫЙКЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **сыйкылдау.** *Карлуғастар сыйкылдашты ер өҫтөндә түбәндә.* Ә. Вәли.

**СЫЙЛАУ** *к.* Сый[2] итеү. *Миналар сыйлаған сакта калтырап торҙо ерҙәр.* Р. Ниғмәти. *Снаряд сыйланымы, шунда ук башым менән ер һөрәм. Ипташтәр көлә.* Д. Исламов.

**СЫЙМА**[1] *и. кар.* **һыҙма**[1].

**СЫЙМА**[2] *и. диал. кар.* **нағыш** 2.

**СЫЙМАКЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **сыймаклау.** *Сыймакланған кағыҙ.*

**СЫЙМАКЛАУ** *к.* **1.** Тегеләй-былай сыйыу; сыйғыслау. *Кағыҙҙы сыймаклау.*

**2.** Арлы-бирле генә яҙыу. *[Врач:] Быныһы газета мәкәләһе, мин сыймаклағайным.* Б. Рафиков.

**3.** *күсм.* Тегеләй ҙә былай йырғыслау, еренә еткермәй теләһә нисек эшләү. *Һука менән ерҙе сыймаклау.* / Төрлө йүнәлештә сатнаған һымак эҙ калдырыу. *Бөтә донъяны томалаған һорғолт кара болоттарҙы сыймаклап йәшен йәшнәне, күк күкрәне.* Я. Хамматов.

**СЫЙМАЛАУ** *к. кар.* **сыймаклау** 1, 2. *Кағыҙҙы сыймалау. Мәкәлә сыймалау.* ■ *Мөхәррәм хәлфә хатты уларға [һыйлай алмағандарға] арлы-бирле сыймаланы ла бирҙе.* Ж. Кейекбаев.

**СЫЙНАУ** *к.* **1.** *һөйл.* Бала илаған һымак шыңшыу (эткә һ. б. карата). *Бүре сыйнау.* ■ *Карауыҙ, койроғон, колактарын үйнатып, әкрен генә сыйнап, яланып алды.* С. Кулибай. *Өҙгөләнеп сыйнаған һәм әсәйемдең аяғы аҫтында яткан ҙур бүрене күргәс кенә, мин иркен тын алдым.* Ә. Бикчәнтәев.

**2.** Үҙәк өҙгөс әсе тауыш менән кыскырыу; сыйылдау. *Ғәйшә әбейҙең өйө стенаһына бер таш килеп тейҙе. Уның артынса Сәләх таҙ сыйнап ебәрҙе. Урамда баҫтырыш, тауыш китте.* И. Ғиззәтуллин. *Айғырҙар талашканын күргәнегеҙ бармы? Өйөр эсендә талашмай улар. Баҫтырышып бер ситкә сығалар ҙа, сыйнап, ажғырышып алышырға тотоналар.* Н. Мусин. / Шундай әсе тауыш сығарыу. *Башта вагон тәгәрмәстәре тәгәрәмәҫкә тырышыпмы, әллә һыуыктан сиркәнепме, рельс өҫтөндә шығырлаған, сыйнаған тауыш сығарҙы.* А. Таһиров.

**СЫЙ-СЫЙ, сый ҙа сый** *окш.* Кабат-кабат сый иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сый-сый итеү. Сый-сый кыскырыу.* ■ *Әллә нимәләр сый-сый килеп сыйылдаша, әллә нимәләр сырылдаша.* Ғ. Дәүләтшин.

**СЫЙЫК** *и.* **1.** Кәләм йәки осло нәмә калдырған эҙ; һыҙык. *Поезд .. мулланың сыйған сыйығына килеп инә башланы.* И. Көҫәпкол.

**2.** Сатнаған эҙ. *Сынаяктың сыйығы.*

**3.** *күсм.* Ниндәйҙер бер насар як, яманларлык сәбәп; бәйләнерлек урын. *[Халык:] Калай булһа ла бер сыйык табырға, башыбыҙҙы төрмәгә индерергә йөрөйһөң* (Хикәйәттән).

◆ **Йөрәккә сыйык сығыу** йөрәк ярылыу, шартлау. *Йөрәккә сыйык сығып үлеү.*

**СЫЙЫЛДАК** *с.* Сый-сый итеп торған. *Сыйылдак тауыш.* / Сый-сый кыскырған. *Сыйылдак суска.*

**СЫЙЫЛДАТЫУ** *к.* Сый-сый иттереү, сый-сый килтереү. *Сый-сый кыскыртыу. Сусканы сыйылдатыу. Сыйылдатып кыскыртыу.* ■ *Азат, гармунын сыйылдатып, бер нисә көйҙө һупалап маташа.* С. Кулибай. *Төлкө шул ике арала бер куян балаһын сыйылдатып тотоп алып та килгән* (Әкиәттән).

**СЫЙЫЛДАУ** *к.* Сый итеү, сый-сый килеү; сый-сый кыскырыу. *Сыйылдаған суска тауышы. Сыйылдап кыскырыу. Сыскан сыйылдай.* ■ *Кашкар соланға ингәс, сыйылдап шыңшый башланы.* С. Кулибай. *Ел ыжылдай, әрем һабактары әсе тауыш менән .. сыйылдай.* А. Карнай. / Сый-сый иткән тауыш сығарыу. *Күҙгә һалкын ел, калай башлы йорттарҙа үҙенә эш таба алмағас, асыуынан сыйылдап һыҙғыра-һыҙғыра, һалам түбәле өйҙәргә килеп куна.* Ә. Зәйнуллин.

**СЫЙЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **сыйылдау.** *Сускалар сыйылдаша.* ■ *Кул етмәле бик якында әллә нимәләр сый-сый килеп сыйылдаша.* Ғ. Дәүләтшин.

**СЫЙЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **сыйыу.** *Төрлө урында шырпы сыйылды.* Д. Юлтый.

**2.** Осло нәмә тейеп эҙ калыу, һыҙылыу. *Муллағәле бабай .. шкафтың сыйылған урындарын һыпырғыларға тотонды.* Р. Солтангәрәев. *Селеклектә сыйылып калған эҙҙәр әле булһа яна балтырҙа.* Р. Бикбаев.

**СЫЙЫРСЫК** *и.* Турғайҙар ғаиләһенә караған йәшкелт кара төҫтәге һайрар күсмә кош. *Сыйырсык ояһы. Сыйырсык ояһы куйыу.* ■ *Балалар куйған ояға ул кош йомортка һала. Окшатып төрлө коштарға бик гүзәл һайрай ала.. Һеҙгә билдәле, балалар, ул сибәр кош — сыйырсык.* С. Кулибай. *Әһем-әһем-әһемсәк,*

*кайтып етте сыйырсык, матур итеп өҙөлөп һайрай, Баһап, тиҙерәк йүгереп сык.* Ғ. Амантай.

♦ **Сыйырсык һыуығы** *кар.* **һыуык** II.

**СЫЙЫУ** *к.* **1.** Кәләм йәки осло нәмә менән нимәгәләр эҙ һалыу; һыҙыу [1]. *Кәләм менән сыйыу.* ■ *Акһак Тимер .. кынынан хәнйәрен һурып алып, тәгәсте хәнйәре менән сыя* (Хикәйәттән).

**2.** Осло нәмә менән эҙ калдырып, йәрәхәтләү; һыҙырыу. *Кулды агаска сыйыу.* ■ *[Пуляның] икенсеһе Гәрәевтың .. колак төбөнән сыйып ебәреп, бармак калынлыгы тиреһен актарҙы.* И. Насыри.

**3.** Ут токандырыу өсөн шырпыны һыҙыра тартыу, һыҙыу. *[Фәхри:] Тфү! Биш шырпы сыйҙым, янмай.* Б. Бикбай. / Шырпы токандырыу. *Һалдат шырпыһын сыйып яктыртты.* Д. Юлтый. *Ғафури тәмәкеһен каба. Айдаров шырпы сыйып Ғафуриға тәкдим итә, ә Ғафури үҙе сыйып токандыра.* С. Кудаш.

**СЫЙЫШ** *и. диал.* Селбәрә.

**СЫЙЫШЫУ** *к.* **1.** *урт. кар.* **сыйыу** 1, 3.

**2.** *кусм.* Үҙ-ара талашыу, яғалашыу. *Сыйышып йәшәү.* ■ *Беҙ тапкан пластинкаларҙың береһендә ике аттың сыйышып торған вакыты күренә.* Н. Мәжитов.

♦ **Йөҙ сыйышыу** *кар.* **йөҙ** [1]. *[Миңһылыу:] Атайың фронтта, .. ситтә көрәшкәндә, мин бында Исхак кулактар менән йөҙ сыйыштым.* К. Кинйәбулатова.

**СЫК** *окш.* Тимер менән ташка һуkканда, сынаk, быяла катыға нык бәрелгәндә һ. б. сыkкан тауышты белдергән һүҙ. *Сык итеп калыу.*

**СЫКМА** *и. диал.* Төләмә. *Сыкма сығыу.*

**СЫКМАЛЫК** *и.* Нимәнелер аша сыға торған урын; сыған. *Ййыктагы сыкмалыктарҙы атлы казактар караган* (Хикәйәттән).

**СЫК-СЫК, сык та сык** *окш.* Кабат-кабат сыk иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сык та сык бәрелеү. Сык та сык итеү. Сык-сык килеү.*

**СЫКТА** *и.* Колонға кейҙерә торған нукта.

**СЫКЫЛДАК** *и.*, **сыкылдак корт** Бүрәнә ярығында сыкылдап тора торған корт.

**СЫКЫЛДАТЫУ** *к.* Сык-сык иттереү, сыk-сыk килтереү. *Сыкылдатып тимер кагыу.* ■ *Машинкала баҫкан кыҙыкайҙың бер кемдә лә эше юк, машинкаһын сыкылдатыуын белә.* Ғ. Ғәйнуллин. *[Түрә] вакыт-вакыт калтыранды. Хатта тешен-тешкә бәреп сыкылдаткан сактары ла булды.* Й. Солтанов.

**СЫКЫЛДАУ** *к.* Сык-сык итеү, сык-сык килеү. *Ташлы юлда сыкылдап ташка бәрелгән дага тауыштары .. мине һиҫкәндерҙе.* Б. Ишемғол. *Наиль хирург инструменттарының йөрәккә үтеп сыкылдауын гына ишетте.* Х. Зарипов.

**СЫЛ** *и. диал.* Икмәк башы (*кар.* **баш** 11).

**СЫЛАНДЫРЫУ** *к. кар.* **сылатыу.** *Үләндәрҙе сыландыр, яу, яу, ямгыр, яу ямгыр.* Ш. Бабич.

**СЫЛАНЫУ** *к.* **1.** Дым, һыу тейеп, яйлап еңелсә һыуланыу, еүешләнеү. *Рахман трактор арбаһының алдында, мискә ауыҙынан сәсрәгән һыуга сыланган килеш, Баныу менән йәнәшә баҫып бара.* Ә. Вәли. *Көҙгө ямгырга сыланып, бөгөләһең йәш кайын.* С. Муллабаев.

**2.** Күҙ йәше менән бөтөнләй каплап алыныу, йәшләнеү. *Капыл уның [Рәшиҙә әбейҙең] күҙҙәре сыланды.* К. Мәргән. *Дуҫтар! Дуҫтар, һиҙгер булайыксы! Сыланмаһын әсә керпеге.* Ғ. Әмири.

**СЫЛАТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **сылатыу.** *Сылатылган кейем. Сылатылган таҫтамал.*

**СЫЛАТЫУ** *к.* **1.** Һыу тейҙереп еүешләү, еңелсә һыулау. *Иренде сылатыу. Тамакты сылатыу.* ■ *Аҫылбикәнең .. кара кускыл биттәренән тәгәрәп төшкән кайнар күҙ йәштәре күкрәктәрен сылатты.* Т. Хәйбуллин. *Үҙе һыуык, үҙе сылата. Берәй ергә тукталып, ямгыр үткәнсе торорғамы әллә?* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Йәшкә батырыу. *Әсәй әүәлгесә кайгыһын да, шатлыгын да йәшкә сылата.* М. Кәрим. *Күҙ йәшеңде йәшер йөрәгеңә, керпегеңде зинһар сылатма.* А. Игебаев.

**СЫЛБЫР** *и.* **1.** Бер-береһенә кейҙерелгән ваk дүңгәләктәр теҙеменән торған, ғәҙәттә аҫыл металдан эшләнгән бау. *Алтын сылбыр. Муйын сылбыры.* ■ *Собхан старшинаның каҙан кеүек түп-түңәрәк корһагына жилет кеҫәһенән көмөш сәгәт сылбыры һалынган.* З. Биишева. *Мәрхүмәнең .. түшендә бронза сылбыр менән .. бронза һырга табылды.* Н. Мәжитов.

**2.** Кылдан, тарманан һ. б. ишелгән оҙон һыңар теҙген. *Алпамышаның инәһе кырк көнлөк аҙык бешерә, һеңлеһе кырк колас ебәк сылбыр ишә, ти. «Алпамыша». Аткынайым китте сылбырын һөйрәп, тоттормаҫмы икән йәйәү йүгерһәм* (Халык йырынан).

**3.** *һөйл.*; Теҙмә, теҙем. *Күлдәр сылбыры. Тауҙар сылбыры.* ■ *Кыҙрас карт, тагы ла Ирәндектең күк сылбырҙарына карап, оҙак һүҙһеҙ торҙо.* Ә. Чаныш.

**4.** *диал. кар.* **сынйыр** 1. *Быгау сылбыры. Сылбырҙагы эт. Сылбырҙан ыскындырыу.*

**СЫЛБЫРЛАУ** *к. диал.* Сынйырлау. *Бер толпар йыуан сылбыр менән мөгәрәп стенаһына сылбырлап куйылган икән, ти* (Әкиәттән).

**СЫЛБЫРЛЫ** *с.* Сылбыр (1 мәғ.) тағылған, сылбыры булған. *Сылбырлы сәгәт.* ■ *Диләнең .. кулында алтын йөҙөк, алтын сылбырлы беләҙектәр ялтырай.* Һ. Дәүләтшина.

**СЫЛҒАУ** *и. кар.* **силгау.** *Зөбәйҙә итеген нык-лап кейеп алды, сылгауҙарының төйөрләнеп, һырланып торган урындарын калдырмай тыгыҙлап ураны.* С. Агиш.

**СЫЛҒЫЙ** [1] *с. диал. кар.* **ылғый** 2. *Сылгый катын-кыҙ.*

**СЫЛҒЫЙ** [2] *с. диал.* Һырғый. *Сылгый тирәк.*

**СЫЛПЫК** *с. диал. кар.* **бысый** 1. *Сылпык күҙ.*

**СЫЛТ** [1] *окш.* Тимергә тимер бәрелгәндә, әләгеп ыскынғанда сыkкан нескә тауышты белдергән һүҙ. *Сылт итеп калыу.* ■ *Сылт итеп солан ишегенең келәһе күтәрел[де].* Б. Бикбай.

**СЫЛТ** [2] *р. кар.* **сырт** [1]. *Күҙҙе сылт йомоу.*

**СЫЛТ** [3] *көс. диал. кар.* **сөм** [2]. *Сылт ак. Сылт кара.*

**СЫЛТЛАТЫУ** [1] *к.* Сылт [1] иттереү. *Сылтлатып бикте асыу.*

**СЫЛТЛАТЫУ** [2] *к. кар.* **сыртлатыу.** *Далай-лама ишек яңагына һөйәлгән килеш үҙенең*

*йәшле күҙҙәрен сылтлатып Чернявскийға оҙаҡ ҡарап торҙо.* А. Карнай.

**СЫЛТЛАУ** *ҡ.* Сылт [1] итеү. *Сәғәт, .. герҙәрен үргә күтәреү менән, сылтлап йөрөп китте.* С. Агиш.

**СЫЛТ-СЫЛТ** [1], **сылт та сылт** *окш.* Ҡабат-ҡабат сылт [1] иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сылт-сылт итеү. Сылт-сылт килеү.* ■ *Өйҙә тынлыҡ. Сәғәт сылт-сылт һуға, ваҡыт һанын ҡыуа минуттар.* А. Игебаев. *Ҡарағай ҙа таҡта, тимер ҡапҡа, сылт-сылт итә ел өргән сакта* (Халыҡ йырынан).

**СЫЛТ-СЫЛТ** [2] *окш. кар.* **сырт-сырт.** *Иҙелгужа .. күҙҙәрен сылт-сылт йомоп, өнһөҙ килеш аптырап ҡарап тора.* Ш. Насыров.

**СЫЛТЫЙ** *и. диал.* Селбәрә.

**СЫЛТЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Сылт-сылт [1] иттереү, сылт-сылт килтереү. *Тәңкәне сылтылдатыу. Сылтылдатып йоҙаҡты асыу.*

**СЫЛТЫЛДАУ** *ҡ.* Сылт-сылт [1] итеү, сылт-сылт килеү. *Өҫтәлдәге .. сәғәт һаман һалмаҡ ҡына сылтылдап ултыра.* Б. Бикбай. *Төн уртаһы еткәс уяныр китәм, сылтылдапҡай һуға ла бер сәғәт* (Халыҡ йырынан).

**СЫЛТЫР 1.** *окш.* Йоҡа сынаяҡ, быяла йәки ваҡ тимер бер-береһенә бәрелгәндә, ҡапыл ҡойолоп киткәндә сыҡҡан нескә тауышты белдергән һүҙ. *Сылтыр итеп ҡалыу.* ■ *Илшат йоҙроғо менән быялаға килтереп һуҡты. Быяла сылтыр итеп ҡойолоп төштө.* А. Ғирфанов. *Сылтыр ғына сылтыр, ай ни, сылтыр, ун ике лә суклы беләҙек* (Халыҡ йырынан).

**2.** *с. мәғ.* Сылтыр-сылтыр итеп аҡҡан саф тауышлы. *Сылтыр ғына шишмә атылып сыға тау итәге сауыл төбөнән* (Халыҡ йырынан).

**СЫЛТЫРАҠ** *и.* Сылтыраған, сылтырап торған нәмә (ғәҙәттә уйынсыҡ, биҙәүес һ. б. була). *Сылтыраҡлы балдаҡ.*

**СЫЛТЫРАТЫУ** *ҡ.* **1.** Сылтыр иттереү, сылтыр-сылтыр килтереү. *Тәңкә сылтыратыу.* ■ *Сәйнүк тә бығыр-бығыр ҡайнап, ҡапҡасын сылтырата башланы.* М. Ғафури. *Тайморзин аскыстарҙы бауынан һелкеп, сылтыратып ҡуйҙы.* М. Тажи.

**2.** Нескә саф тауыш сығарыу. *Ҡатын бөтә магазинды яңғыратып, сылтыратып .. көлөп ебәрҙе.* С. Агиш.

**СЫЛТЫРАУ** *ҡ.* **1.** Сылтыр итеү, сылтыр-сылтыр итеү, сылтыр-сылтыр килеү. *Сылтырап ағыу. Сылтырап ҡойолоу. Сылтырап тороу.* ■ *Бер генә ҡатлы, ҡырҡ ҡораулы тәҙрәләр, көслө елдең өрөүенә түҙмәй көйөҫ-көйөҫ сылтырап китә.* Ғ. Дәүләтшин. *Йә, баҫ әле, Әскәбем, сылтыраһын сәскабың.* Т. Йәнәби.

**2.** Сылтыр-сылтыр итеү, сылтыр-сылтыр итеп ағыу (һыуға ҡарата). *Йылға .. ҡырсынташтар араһынан терегөмөштәй аҡ, саф булып сылтырап аға.* З. Биишева. *Эй, еркәйем, .. шишмә генә булып сылтырасы, үлән генә булып ҡыштырла!* Р. Бикбаев.

**СЫЛТЫРАУЫҠ** *с.* Сылтыр-сылтыр иткән, сылтыр-сылтыр килгән. *Сылтырауыҡ тәңкә. Сылтырауыҡ шишмә.* ■ *Ҡыҙға .. сылтырауыҡ шишмә буйҙары, һөҙәк тауҙар бик окшай икән.* З. Ғәлимов.

**СЫЛТЫРАШЫУ** *ҡ. урт. кар.* **сылтырау.** *Гөрләүектәр сылтырашып аға.* ■ *[Гөльямалдың] үргән сәсе осонда .. көмөш тәңкәләр сылтыраша.* Я. Хамматов.

**СЫЛТЫРЛАҠ** *с. кар.* **сылтыраҡ.**

**СЫЛТЫРЛАТЫУ** *ҡ. кар.* **сылтыратыу** 1. *Аҡсаны сылтырлатыу.*

**СЫЛТЫРЛАУ** *ҡ. кар.* **сылтырау.** *Тәңке сылтырлай.*

**СЫЛТЫРМАҠ** *и. кар.* **суҡ** [1] 3.

**СЫЛТЫР-СЫЛТЫР, сылтыр ҙа сылтыр** *окш.* **1.** Ҡабат-ҡабат сылтыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сылтыр-сылтыр итеү. Сылтыр-сылтыр килеү.* ■ *Төн ҡараңғы, тышта ел ҡотора, ҡар тауҙарын өйә урамға. Сылтыр-сылтыр килә тәҙрәләр сыҙай алмай ҡаты буранға.* Т. Йәнәби. *Өйәр һыуы хәтәр көлә, .. боҙҙары сылтыр-сылтыр килә.* Т. Йосопов.

**2.** Һыу ташҡа бәрелеп аҡҡанда сыҡҡан яғымлы нескә тауышты белдергән һүҙ. *Сылтыр-сылтыр аҡҡан һыу.* ■ *Тау шишмәһе, шиғырымды түгел, сылтыр-сылтыр көйләй уҙ йырын.* М. Кәрим.

**СЫЛТЫРТ** *окш.* Сылтыр итеп ҡапыл өҙөлгән тауышты белдергән һүҙ. *[Ғәмилә:] Көмөш бысағым сылтырт итеп иҙәнгә төшөп кит[те].* Б. Бикбай. *Ватылды тәҙрә шырт итеп, шырт ҡына түгел шул, ул бит ҡыйрай сылтырт итеп.* Ш. Бабич.

**СЫЛЫМ** [1] *и. диал. кар.* **лайла** 1. *Балыҡ сылымы.*

**СЫЛЫМ** [2] *и. диал.* Сыуын. *Сылым һалыу.*

**СЫМ** *и.* Электр үткәреү өсөн хеҙмәт иткән төрлө сыбыҡтимер. *Телефон сымы. Электр сымы. Сым һуҙыу.* ■ *Ел короламаларға, телеграф сымдарына бәрелеп геүләй.* З. Рафиҡов.

**СЫМ-СЫҠЫР** *и. диал.* Сыр-сыу. *Сым-сыҡыр килеү.*

**СЫМ-СЫРЫҠ** *с. кар.* **шым-шырыҡ.** *Сым-сырыҡ ултырыу.*

**СЫМЫЛДЫҠ** *и.* Сатыр һымаҡ итеп ҡорола торған урын, түшәк шаршауы. *Ебәк сымылдыҡ. Ҡыҙыл сымылдыҡ. Сәңгелдәк сымылдығы. Сымылдыҡты асыу. Сымылдыҡты төшөрөү.* ■ *Туй көнө килеп еткәс, еңгәләр өйгә сымылдыҡ .. ҡороп, мамыҡ түшәктәр түшәп, кейәү менән ҡыҙға урын әҙерләне.* З. Биишева.

**СЫМЫЛДЫРЫҠ** *и. диал.* **1.** Сымылдыҡ.

**2.** *кар.* **битлек** 1.

**СЫМЫР** *окш.* Тәндә нимәләр йөрөгән кеүек булғанды йәки ҡапыл өшөп киткән һымаҡ булғанды белдергән һүҙ; семер. *Тәнем сымыр итеп китте.*

**СЫМЫРҒАНЫУ** *ҡ.* Ниндәйҙер хистән тән тартылыу йәки ҡалтыраныу ҡуйыу. *Ерәнеп сымырғаныу.* ■ *[Нәркәс:] Уның [һәүбәндең] ҡаны ҡойолһа, сымырғаныр тәнем.* «Аҡбуҙат». *Сымырғанды тәнем курҡыуҙан* (Халыҡ йырынан).

**СЫМЫРЛАТЫУ** *ҡ.* Сымыр иттереү, сымыр-сымыр килтереү; семерләтеү. *Төн яғынан иҫкән эсе ел кергәзин еләндәрҙән үтеп, тәндәрҙе сымырлата башланы.* М. Ғафури. *Гөжләп сыҡҡан ҡурай тауышы тәндәрҙе сымырлата.* Т. Хәйбуллин.

**СЫМЫРЛАУ** *к.* **1.** Тәндә нимәлер йыбырлап йөрөгән кеүек йәки ҡапыл өшөп киткән һымаҡ тойғо кисереү; семерләү. *Арҡа һабағы сымырлай.* ■ *Һиҫкәнә йән, сиркәнә тән һәм сымырлай арҡалар.* Ш. Бабич. *Оҫолло еңгәнең .. ҡымыҙын бер-ике алдыр эсеү менән, башыңа сығып, быуындарың сымырлап, .. бөтә тәнеңә тарала.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *кар.* **быҙырлау** 1. *Балы сымырлап ултыра.*

**СЫМЫР-СЫМЫР** *окш.* Ҡабат-ҡабат сымыр иткән тойғоно белдергән һүҙ. *Сымыр-сымыр итеү. Сымыр-сымыр килеү.*

**СЫМЫРЫ** *с.* **1.** Еренә еткереп эшләүсән; оҫта. *Сымыры кеше. Эшкә сымыры егет. [Ҡорбан] бик матур итеп йорттар һала, йәнә башҡа нәмәләр яһай белә торған сымыры балта оҫтаһы ине.* Х. Мохтар. *Сәлимә .. сымыры ҡыҙыҡай булып сыҡты.— бөтә эш-көштө [Аллаяр менән] икәүләп бөтөрәләр.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Кәүҙәгә ныҡлы, таҙа, баҙыҡ. *Сымыры бала. Сымыры кәүҙәле. Сымыры ҡул. Сымыры булыу.* //*Сымыры атлау. Сымыры һөйләшеү.* ■ *Ҡыҙ .. сымыры баҫып, түргә табан атланы.* Һ. Дәүләтшина. *Егет .. торған һайын сымырыраҡ ишә башланы.* Ф. Иҫәнғолов.

**СЫМЫРЫЛАНЫУ** *к.* **1.** Сымырыға (1 мәғ.) әйләнеү, сымыры булыу. *Эшкә сымырыланыу.*

**2.** Нығынып баҙыҡҡа әйләнеү, баҙыҡ булыу. *Нурия бигерәк сибек кәүҙәле ине, хәҙер сымырыланыбыраҡ киткән.* Н. Мусин.

**СЫН** *с.* **1.** Үҙенән генә торған, башҡа нәмә ҡатнашмаған; һәлма гүгел; саф. *Сын алтын. Сын мәрйен. Сын тимер.*

**2.** *кар.* **саф** 5. *Мин быға хәтле яҙылып килгән ғилми ойошманың сын башҡорт телендә .. күренгән етешһеҙлектәре тураһында бер нисә һүҙ әйтеп китмәк булам.* Ш. Хоҙайбирҙин. *Сынаяғым сын имеш, эсе тулы сын емеш* (Халыҡ йырынан).

**3.** *кар.* **ысын.** *Сынын әйтеү.*

◆ **Сын яһау** *кар.* **яһау**[4]. **Сын һиҙәп** перламутрҙан эшләнгән һиҙәп.

**СЫНАҒАС** *и.* Алһыу сәскәле, киң киртләс япраҡлы, ҡаты һабаҡлы күп йыллыҡ үлән. *Бакса сынағасы. Ҡыр сынағасы.*

**СЫНАЙЫР** *и. диал.* Ваҡ йылға балығы, ваҡ сабаҡ.

**СЫНАР** [*фарс.*] *и.* Платандар төркөмөнә ингән киң киртләс япраҡлы, бейек олонло йылы яҡ ағасы. *Ауылдың ҡап уртаһындағы тыныс түңәрәк күл .. таң ҡыҙыллығын һәм тирә-яғында үҫеп ултырған өйәңке, сынар ағастарының шәүләләрен йоҡҡан.* И. Көҫәпҡол.

**СЫНАЯҠ** *и.* **1.** Сәй эсеү өсөн аҫлы-өҫлө итеп эшләнгән фарфор-фаянс һауыт. *Бер пар сынаяҡ. Бер сынаяҡ сәй. Буталлы сынаяҡ. Ҡоршаулы сынаяҡ. Сын сынаяҡ. Ҡытай сынаяғы. Сынаяҡҡа сәй яһау.* ■ *Ғарифуллин .. һыуынған сәйен ҡапыл күтәреп эсте лә сынаяғын шаҡ иттереп өҫтәлгә ултыртты.* С. Агиш. *Балсыҡ әҙер булғас та, станокка ҡуялар. Унда уны ҡалыплап, сынаяҡ итеп ҡоялар.* Ғ. Амантай. **Сынаяҡ аҫты** сәй эсә торған парлы һауыттың аҫҡа ҡуйылған йәйпәк өлөшө. *Сынаяҡ аҫтына ҡойолған сәй эселмәй һыуынды.* Т. Хәйбуллин. **Сынаяҡ өҫтө** сәй эсә торған парлы һауыттың өҫкә ҡуйылған йомро өлөшө. *Шәрәф сынаяҡ өҫтөн түңкәрҙе.* Б. Бикбай.

**2.** Юғары сифатлы аҡ балсыҡтан иҙеп, яндырылған матдә. //*Сынаяҡ стена. Сынаяҡ уйынсыҡ.* ■ *Стеналар мәрмәр, сынаяҡ иҙән, станцияла таҙа йыйнаҡлы.* Ғ. Сәләм.

◆ **Сынаяҡ кеүек** ҙур, йомро булып тупайып торған (күҙгә ҡарата). *Диләфруздың оҙон керпектәре күтәреләләр ҙә, .. сынаяҡ кеүек ҙур күк күҙҙәре егеттең йөрәгенә ҡаҙалалар.* Б. Бикбай.

**СЫНЙЫР** [*фарс.*] *и.* **1.** Бер-береһенә үткәреүле дүңгәләктәрҙән теҙеп яһаған металл бау. *Тимер сынйыр. Быгау сынйыр. Сынйырҙағы эт. Сынйырҙан ысҡындырыу.* ■ *Буре балаһы тамам ҡулға эйәләшеп китте... Беҙ уны сынйырға бәйләп тота инек.* С. Кулибай. *Кем йыһанды тетрәтә шатырлатып сынйырҙарын.* Ш. Бабич.

**2.** *күсм.* Иректе быуған, ирекһеҙ иткән нәмәгә ҡарата. *Колониализм сынйыры. Ҡоллоҡ сынйыры.*

**3.** *кит. кар.* **теҙем** 1. *Ике яҡта ла бейек тауҙар сынйыры һуҙылған.* Ғ. Әмири.

**СЫНЙЫРА** *и.* Аттың түшенә сыға торған ҡаты шешек. *Сынйыраны дауалау. Сынйыра сығыу.*

**СЫНЙЫРЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **сынйырлау.** *Аяк-ҡулды сынйырлатыу.*

**СЫНЙЫРЛАУ** *к.* Сынйыр (1 мәғ.) һалыу, сынйыр (1 мәғ.) менән бәйләү. *Алпамыша батыр бер имән төбөнә килеп, буҙ толпарын сынйырлап бәйләп ҡуйҙы ла, ял итергә ятты, ти.* «Алпамыша». *Дейеүҙең әмере буйынса, Түҙемголдо, ҡул-аяғын сыңйырлап, ҡараңғы зинданға ябып ҡуйғандар, ти* (Әкиәттән).

**СЫНЙЫРЛЫ** *с.* Сынйыр (1 мәғ.) менән бәйле. *Сынйырлы эт.*

**СЫНЫҒЫУ** *к.* **1.** Юғары температурала ҡыҙҙырып, ҡапыл һыуытҡандан ҡатыға, ныҡҡа әйләнеү (металға һ. б. ҡарата). *Мартендарҙа ҡарап торғаным бар утта сыныҡҡанын ҡоростоң.* В. Ишмурзин.

**2.** Эш, күнегеүҙәр менән физик яҡтан нығыныу, төрлө тәьҫирҙәргә бирешмәҫ булыу. *Эштә сынығыу. Спорт менән сыныҡҡан кеше.* ■ *[Фатима:] Походта йөрөү өсөн сынығырға кәрәк.* Ә. Бикчәнтәев. *[Ауыл ҡыҙының] беләктәре эшләп сыныҡкандар, көмөш тирҙәр биткә йүгергән.* Ғ. Мәсғүт.

**3.** Ауыр тормош шарттарында, көрәштә һ. б. нығынып, рухи яҡтан көслөгә, сыҙамлыға әйләнеү. *Беҙ тағы ла фронтка, тағы ла ҡан эсенә бара инек. Ләкин .. хәҙер инде беҙ асыҡ фекер, сыныҡҡан көрәш тәжрибәләрен тейәп бара инек.* Д. Юлтый. *Бында подполья, баррикадаларҙа Ленин партияһы сыныҡҡан.* Р. Ниғмәти.

● *Ҡорос ҡайнауҙа сынығa, батыр майҙанда сынығa.* Әйтем.

**СЫНЫҠТЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **сыныҡтырыу.** *Сыныҡтырылған организм.* ■ *Һоло менән сыныҡтырылған мыҡты аттар күсергә ҡыуырға ирек бирмәй .. алға барыуҙарында ине.* Ғ. Дәүләтшин.

**СЫНЫҠТЫРЫУ** *к.* **1.** Юғары температурала ҡыҙҙырғандан һуң ҡапыл һыуытып, ҡатыға, ныҡҡа әйләндереү. *Машина рессорын сыныҡ-*

тырыу. ■ *Коросто сыныктырған ут һымак, ижад эсендәге интегеү.* М. Хәй.

**2.** Эш, физик күнекмә һ. б. ярҙамында тәнде көслө, нык итеү, ауырыу-сырхауға бирешмәҫ итеү. *Тәнде сыныктырыу.* ■ *[Һыуык бабай] әйтә: «Минән һис куркмағыҙ, һыуык, ти, сыныктыра.* С. Әлибаев.

**3.** Кемделер ауыр тормош шарттарына, көрәшкә һ. б. күнектереп, рухи яктан көслө итеү, сыҙамлыға әйләндереү. *Заман шағирҙы сыныктыра, донъяға карашын үҙгәртә һәм киңәйтә.* Ғ. Рамазанов.

**СЫҢ** *окш.* **1.** Тимер, быяла кеүек нәмәләргә һукканда йәки улар бер-береһе менән бәрелешкәндә яңғырап сыккан оҙайлы нәҙек тауышты белдергән һүҙ. *Сың итеү. Сың итеп калыу.*

**2.** *и. мәг.* Шуға окшаш тауыш. *Бығау сыңы. Рельс сыңы. Сүкеш сыңы. Тәңкә сыңы.* ■ *Коштар йыры, тау шишмәһе моңо кушылып акты салғым сыңына.* С. Ғәбиҙуллин. *Мин ғашикмын аяҙ көн йөҙөнә, һауаларҙың көмөш сыңына.* Р. Шәкүр.

**СЫҢҒА** *и.* Дуға, йүгән, сынйыр кеүек нәмәләгә тимер түңгәләк. *Дуғаның сыңғаһы.* ■ *Тетрәнеп, сыңғырлап куя ауыҙлык сыңғалары.* Х. Назаров.

**СЫҢҒАЛАУ** *к.* Сыңғалы итеү, сыңға куйыу. *Дуғаны сыңғалау.*

**СЫҢҒАРСАЙ** *и.*, **сыңғарсай бармак** Кул-аяктың ситтәге иң бәләкәй бармағы.

**СЫҢҒЫЛ** *окш.* Еҙ кыңғырауҙың өҙөк тауышын йәки йока тимер нәмәгә тейеп киткәндә сыккан тауышты белдергән һүҙ. *Сыңғыл итеү.*

**СЫҢҒЫЛДАК** *и.* Бәләкәй еҙ кыңғырау.

**СЫҢҒЫЛДАТЫУ** *к.* Сыңғыл-сыңғыл иттереү. *Сыңғылдак сыңғылдатыу.* ■ *Шул сәғәт .. ҙур барабандар кағып, борғо, торба һәм һыбыҙғылар табып, .. гөрләтеп, сыңғылдатып, дөмбөрләтеп киттеләр Каф тауҙы буйлатып-ишләтеп.* Ш. Бабич.

**СЫҢҒЫЛДАУ** *к.* Сыңғыл-сыңғыл итеү, сыңғыл-сыңғыл килеү; сыңғырлау. *Дуғалағы сыңғылдак сыңғылдап бара.*

**СЫҢҒЫЛ-СЫҢҒЫЛ** *окш.* Кабат-кабат сыңғыл иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сыңғыл-сыңғыл итеү. Сыңғыл-сыңғыл килеү.*

**СЫҢҒЫР 1.** *окш.* Тимер нәмәләр бер-береһенә бәрелгәндә яңғырап киткән оҙайлы калтырауык тауышты белдергән һүҙ. *Сыңғыр итеү.*

**2.** *с.* Сылтырап аккан саф тауышлы. *Тау битендә йылк-йылк итеп, сыңғыр шишмә сылтырай* (Халык йырынан).

**СЫҢҒЫРАТЫУ** *к.* **1.** Сыңғыр иттереү; сыңғыр-сыңғыр иттереү; сыңғырлатыу. *Сәс тәңкәһен сыңғыратыу. Кыңғырауҙы сыңғыратыу.*

**2.** Яңғырауыклы саф тауыш сығарыу. *Сыңғыратып гармун уйнау. Сыңғыратып кешәнләү. Сыңғыратып көлөү.* ■ *[Колон] инәһен эҙләп сыңғыратып сабып йөрөй.* Ғ. Хөсәйенов.

**СЫҢҒЫРАУ** *к.* **1.** Сыңғыр итеү, сыңғыр-сыңғыр итеү, сыңғыр-сыңғыр килеү. *Салауат батыр менән Юлайҙың сыңғырайҙыр тимер бығауы* (Халык йырынан).

**2.** Яңғырауыклы саф тауыш биреү. *Миңһылыуҙың .. сыңғырап сыккан көслө тауышы клубты [тетрәтеп] ебәрҙе.* Р. Солтангәрәев. *Борғо һыҙғыра сыңғырап.* С. Кулибай.

**СЫҢҒЫРЛАК** *и. һөйл.* Сыңғырлай торған нәмә.

**СЫҢҒЫРЛАТЫУ** *к.* Сыңғыр-сыңғыр иттереү, сыңғыр-сыңғыр килтереү. *Кыңғырауҙы сыңғырлатыу.* ■ *Мәрйен, оҫта һикереп, велосипедына атланды ла, уның звоногын сыңғырлата-сыңғырлата күпергә тәгәрәне.* Һ. Дәүләтшина.

**СЫҢҒЫРЛАУ** *к.* Сыңғыр итеү; сыңғыр-сыңғыр итеү, сыңғыр-сыңғыр килеү. *Туры бурыл йөрөй курпы утлап, еҙ кыңғырау куя сыңғырлап.* Х. Назаров.

**СЫҢҒЫРЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **сыңғырлау.**

**СЫҢҒЫРСАК** *и. диал.* Сыңға. *Ат өҫкәйҙәрендә ыңғырсак, дуғаларҙа булә сыңғырсак* (Халык йырынан).

**СЫҢҒЫР-СЫҢҒЫР** *окш.* Кабат-кабат сыңғыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сыңғыр-сыңғыр килеү.* ■ *Мөксин ағай .. сисенгәнендә орден-миҙалдары сыңғыр-сыңғыр итеп калды.* Н. Мусин.

**СЫҢК** *окш.* Ғәҙәттә тимер, калай, бик йока быяла кеүек нәмәгә тейеп киткәндә йәки улар бер-береһенә һуғылғанда сыккан яңырауыклы өҙөк тауышты белдергән һүҙ. *Сыңк итеү.*

**СЫҢК-СЫҢК, сыңк та сыңк** *окш.* Кабат-кабат сыңк иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сыңк-сыңк итеү. Сыңк-сыңк килеү. Сыңк-сыңк салғы яныу. Сүкеш менән сыңк-сыңк һуғыу.*

**СЫҢКЫЛДАТЫУ** *к.* Сыңк-сыңк иттереү; өҙөк-өҙөк яңғырап киткән тауыш сығарыу. *Тимер баҫкыстарға сыңкылдата баҫып, Ишғуған алдан атланы.* З. Биишева. *Сыңкылдата янып салғымды бесән генә сабам уҙактә* (Халык йырынан).

**СЫҢКЫЛДАУ** *к.* Сыңк-сыңк итеү, сыңк-сыңк килеү; өҙөк-өҙөк яңғыраған тауыш сығарыу. *Урамығыҙ таш икән, даға сыңкылдай икән* (Халык йырынан).

**СЫҢЛАТЫУ** *к.* **1.** Сың иттереү, сың-сың килтереү. *Сыңлатып салғы яныу.* ■ *[Зөлхизәнең] сәс толомдарына тағылған көмөш сулпыларҙың елбәҙәк суктарын еләҙ елдәр сыңлатып уйнай.* З. Биишева. *Ғәйнислам ағай, көмөш кыңғырауын көй тактына сыңлата-сыңлата, ғүмерлек юлдашы тальянкаһын һуҙа.* Х. Назаров. / Зыңлап ишетелгән һымак булып колакты, башты тондороу. *Көнө-төнө укыу минең күҙ кабактарымды шештерә, башымды ауырттыра, колактарҙы сыңлата.* Х. Назаров.

**2.** Сың итеп яңғырап торған нәҙек тауыш сығарыу (ғәҙәттә уйын коралдарында уйнауға карата әйтелә). *Бер шәкерт кумыҙ сыңлата, э Шәһит бейей.* Ғ. Әмири. *Скрипкаһын көйләп алғас, ул [Әминбәк] сыңлатып уйнап ебәргән* (Әкиәттән).

**СЫҢЛАУ** *к.* **1.** Сың итеү, сың-сың итеү, сың-сың килеү. *Сыңлап тороу. Сыңлап ишетелеү.* ■ *Состав тертләп куйҙы, сак кына артка сигенде, эшелондың башынан-башына буферҙар сыңлауы йүгереп үтте, поезд әкрен генә куҙғалды.* Х. Мохтар. *Кылы сыңлап өҙөлөп, селпәрәмә килгән гитара.* Р. Бикбаев. / Сың иткәндәй тауыш ишетелеү; сеңләү. *Ишбулдының башы эл*

лә нишләп сыңлап ауырта башланы. Ә. Вәли. Ҡолаҡтар сыңлай, баш тубал кеүек. Д. Исламов.

**2.** Яңғырап асыҡ ишетелеү, сағыу, саф булыу (кешенең, уйын ҡоралдарының тауышына ҡарата). *Ҡайҙа булған һуң әсәйҙең сыңлап торған матур тауышы?* М. Кәрим. *Мин ҡурайҙың моңло сыңлауында алыҫ үткәндәрҙе ишетәм.* Ғ. Әмири.

**3.** *күсм.* Онотолмай, юғалмай ишетелгән һымаҡ булыу. *Мәфрүзә ханымдың һөйләгән һүҙҙәре .. ҡолаҡ төбөндә сыңлап барҙы.* С. Агиш. *Мин онотмам һинең йырҙарыңды, күңелемдә сыңлар гел генә.* Ҡ. Даян.

**СЫҢЛАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **сыңлау.** *Шул ваҡыт сәмгемдә төрлө иҫке моңдар сыңлаша.* Ш. Бабич.

**СЫҢРАУ** [1] *к.* Иңрәгән һымаҡ яңғырауыҡлы нәҙек тауыш сығарыу (ҡолон, торна һ. б. ҡарата). *Сыңрай-сыңрай зәңгәр һауаларҙа торналар ҙа осоп киттеләр.* Р. Сафин. *Сыңғыр-сыңғыр сыңраған йылҡыһы күп Уралтау* (Ҡобайырҙан).

**СЫҢРАУ** [2] *с.* Тауышы моңло, һағышлы (торнаға ҡарата). *Сыңрай-сыңрай осоп килде сыңрау торнаҡай.* Р. Ғарипов.

**СЫҢ-СЫҢ, сың да сың** *окш.* Ҡабат-ҡабат сың иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сың да сың килә ҡылыс.* Х. Ғиләжев. *Сың-сың итеп, сылтырсылтыр килеп көмөш сулпыларын сыңлатып, иҡе һылыу тештө һыу буйына, йөҙҙәрендә шәфәҡ уйнатып.* Р. Шәкүр.

**СЫП-** Сы- ижеге менән башланған сифат йәки рәүештәргә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһен бирә. *Сып-сыбар.*

**СЫПАНЛАУ** *к. ҡар.* **сыпранлау.** *Аҫау айғыр .. бер урында сыпанлап бейеп торҙо ла түҙмәй елдереп сығып та китте.* Й. Солтанов.

**СЫПҠАЙ** *и. шул ук* **сыпҡай өйрәк** (*ҡар.* **өйрәк** 1).

**СЫПРАНЛАҠ** *с.* Тик тормоған, бушҡа ығы-зығы килгән, түҙемһеҙ. *Сыпранлаҡ кеше.* ■ *[Әүлиә:] Һеҙ, үҙ илендә күсенеп йәшәр халыҡтар, .. сыпранлаҡ була күрмәгеҙ* (Әкиәттән).

**СЫПРАНЛАТЫУ** *к.* Сыпранларға юл ҡуйыу.

**СЫПРАНЛАУ** *к.* Тик тормай бушҡа ығы-зығы килеү, унда-бында һуғылыу; түҙемһеҙләнеп сәбәләнеү. *[Йыһаншин:] Бына, иптәш Янһаров бик тура һәм ҡаты сығыш яһаны. .. Һин, Солтанов, юҡҡа сыпранлама.* Б. Бикбай. *[Нигмәтулла:] Ирһеҙ оҙаҡ йәшәгән бисә өйрәтелмәгән тай менән бер була бит ул. Сыпранлай-сыпранлай ҙа, теҙгенен ҡыҫҡараҡ тотҡан эйәһе табылғас та йыуаша.* Я. Хамматов.

**СЫПРАНЛАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **сыпранлау.**

**СЫПСЫҠ** *и.* **1.** *ҡар.* **сәпсек** 1. *Аҡ сапсыҡ. Сыбар сыпсыҡ. Һарыбаш сыпсыҡ. Һары сыпсыҡ.*

**2.** *диал. ҡар.* **турғай** 1.

**СЫП-СЫП** *окш.* Һыулы ергә тамсы тамғанда, еүеш аяҡ менән баҫҡанда һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Сып-сып итеү. Сып-сып итеп тамсы тама.*

**СЫПТЫРЛАТЫУ** *к.* Әҙ генә, яй ғына ҡойолтоу (шыйыҡлыҡҡа ҡарата). *Сыптырлатып һыу ағыҙыу.*

**СЫПТЫРЛАУ** *к.* Әҙ генә, яй ғына ҡойолоу (шыйыҡлыҡҡа ҡарата). *Һемәктән сыптырлап ҡына һыу аға.*

**СЫПТЫРЫУ** *к.* Сыбыҡ менән һуҡҡылау; һыҙырыу. *[Сабир:] Был хәтле лә ҡыр ҡәзәһе булыр икән. .. Их, сыптырып, аҡылға өйрәтер кешеһе юҡ шул.* З. Биишева.

**СЫПЫЙ** *с. диал.* Бысый. *Сыпый ҡуҙ.*

**СЫПЫЛДАТЫУ** *к.* Сып-сып иттереү, сып-сып килтереү; сапылдатыу. *Сыпылдатып тамыҙыу.* ■ *[Хәйретдингә] бысраҡ сабатаһын сыпылдатып [түргә] үтеүе әллә нисек тойолдо.* Я. Хамматов.

**СЫПЫЛДАУ** *к.* Сып-сып итеү, сып-сып килеү. *Ҡыйыҡ баштарынан сыпылдап тамсы тама.* И. Ниғмәтуллин.

**СЫПЫРЛАТЫУ** *к. һөйл.* Сыпыр-сыпыр иттереү, сыпыр-сыпыр килтереү. *Һыуҙы сыпырлатыу. Сыпырлатып ҡойоу.* ■ *Хәҙисә .. мейес башына йылғыр ғына менеп китте, һауытҡа сыпырлатып бал ҡойҙо.* Н. Мусин.

**СЫПЫРЛАУ** *к.* Сыпыр-сыпыр итеү, сыпыр-сыпыр килеү. *Кисә генә үҙҙәрендә мунса ингән Зәки [йыуынырға] теләп барманы, апаһының һүҙен йыҡмаҫ өсөн генә инеп, сыпырлап сыҡты.* С. Агиш.

**СЫПЫР-СЫПЫР** *окш.* Һыу сәсрәткәндә, ҡойонғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Сыпыр-сыпыр итеү. Сыпыр-сыпыр ҡойоноу.* ■ *Ағайыма суртан ҡапты, миңә сабаҡ эләкте. Сыпыр-сыпыр йөҙә улар, сайҡалдырып силәкте.* С. Муллабаев.

**СЫПЫШ** *с. диал.* Сомтор. *Сыпыш ҡойроҡ.*

**СЫР** [1] [*рус.*] *и.* Махсус әсеткән һөттөң һыуын һарҡытып эшкәртелгән ашамлыҡ. *Голландия сыры. Сыр заводы.*

**СЫР** [2] *и.* Ябыҡ итте йәки балыҡты бешергәндә һурпа өҫтөнә ҡалҡҡан ваҡ-ваҡ ҡына түңәрәктәрҙән ғибәрәт өрө. *Ашаған ашында суртан сыры ла юҡ бит.* С. Ҡудаш. *Туйға килгән туйлыҡтың, бешерәйем тиһәм, сыры юҡ* (Туй йырынан).

**СЫР** [3]: **сыр ялանғас** 1) өҫтөндә кейеме булмаған, кейемһеҙ. *Сыр ялանғас балалар;* 2) кейем-һалымы насар; ярлы.— *Икегеҙ ҙә сыр яланғас инегеҙ, кейем бирҙек.* Һ. Дәүләтшина.

**СЫР** [4] *окш.* Ҡалтырап сыҡҡан нәҙек кенә тауышты белдергән һүҙ. *Сыр итеү.*

**СЫР** [5] *и. диал.* Селбәрә. *Ваҡ сыр.*

**СЫР** [6] *и. диал. ҡар.* **һыр** [1]. *Кулдәккә сыр һалыу.*

**СЫРА** [*фарс.*] *и.* **1.** Ут тоҡандырып ебәреү өсөн йоҡа ғына итеп ярғыслаған ҡоро ағас. *Ҡарағай сыраһы. Сыра телеү. Сыра яндырыу.* ■ *Ғәлимә еңгә .. кистән мейес эсенә тултырып ҡуйған утынына сыра менән ут төртөп ебәрҙе.* Б. Ишемғол. / Яҡтылыҡ өсөн яндырылған ҡоро йоҡа ағас. *Сыра яҡтыһы. Сыра яҡтыртыу.* ■ *[Сәйҙеямал — Хисмәтуллаға:] Утынды әрәм итмә, ҡышҡа ҡалһын. Сыра ғына яҡтырт.* Я. Хамматов. *Сыра уты талғын тирбәлә. .. Йырҙар яҙа егет тирмәлә.* Р. Бикбаев.

**2.** *диал.* Тағара.

◆ **Сыра кеүек** ҡаҡса, ябыҡ кешегә ҡарата әйтелә. *[Айбулат:] Әй, бала, әсәйең бик насар ҡарай икән һине. .. Үҙең атлап йөрөйһөң, үҙең сыра кеүек еп-еңелһең.* Ғ. Ибраһимов. **Сыра кеүек тоҡаныу** ҡыҙыу кешегә ҡарата әйтелә.

*[Управляющий:] Ярар, ярар. Һиңә бер нәмә әйтерлек түгел. Сыра кеүек токаныып бараһың.* Я. Хамматов.

**СЫРАЙ** *и.* Кешенең булмышын, физик хәлен сағылдырған бит, йөҙ. *Аҡ сырайлы бала. Оло сырайлы кеше. Сырайы ҡарт кеше.* ■ *Фуат ағайҙың ярғаҡ сырайы, ҡыҫыбыраҡ ҡараған күҙҙәре — бөтәһе лә иҫемдә минең.* Н. Мусин. / Кешенең рухи хәленең, уй-тойғоһоноң, кисерештәренең йөҙҙәге, төҫтәге сағылышы. *Асыҡ сырай. Яҡты сырай. Көләс сырай менән ҡаршылау.* ■ *Һылыу ҡортҡаның сырайы боҙолдо.., башына таяҡ менән һуҡҡан һымаҡ [булды].* Т. Йәнәби. *Сәйҙел Зәйнәп йөҙөнә ҡараны — көләс ине Зәйнәп сырайы.* Ғ. Сәләм. **Ҡараңғы** (*йәки* **ҡара) сырай менән** яратмай, ризаһыҙлыҡ белдереп. **Сырай китеү** ағарынып төҫ боҙолоу. *Был һүҙҙе ишеткәс, Этколдоң сырайы китеп, төҫө үҙгәрҙе.* Ғ. Дәүләтшин. **Сырай(ҙы) һытыу** нимәнәндер ҡәнәғәт, риза булмай йөҙҙөң тәбиғи хәлен үҙгәртеү, боҙоу. *Пристав Ныязғолдоң һөйләгәненен сырайын һытып тыңланы: «Юҡты һөйләй, үҙен гәйептән ҡотҡарырға тырыша.* Һ. Дәүләтшина.

**СЫРАЙҺЫҘ** *с. һөйл.* Төҫкә-башҡа күркһеҙ, төҫһөҙ. *Сырайһыҙ ҡыҙ бала. Сырайһыҙ булыу.*

**СЫРАЙЫШЫУ** *к.* Ризаһыҙлыҡ күрһәтеп төҫтө боҙоу. *Байҙар, бейҙәр Алпамышаның кәмһетелгән бер ырыу кешеһе икәнен белеп сырайышалар.* «Алпамыша».

**СЫРАҠ** [*фарс.*] *и.* **1.** Яҡтылыҡ өсөн берәй ҡулайламаға ҡуйып яндырылған ҡоро йоҡа ағас телеме. *Сыраҡ яндырыу. Сыраҡ менән яҡтыртыу.* ■ *Мәмерйә эсе ҡараңғы. Бер мөйөштә сыраҡ ҡына яна.* Ш. Насыров. *Эй Саҡый! Яҡтырт сыраҡ менән ултырҡан бүлмәне.* Д. Юлтый.

**2.** Балыҡ сәнскәндә һыуҙы яҡтыртыу өсөн сыра яндыра торған ҡулайлама. *Ғәйзулла бабай .. ҡулында дөрләп янған сырағын арҡҡараҡ ала. Әһә, балыҡ бар!* Н. Мусин. *Ел тейҙермәй ҡулға тотҡан сырағыма үтерменме был тормоштоң һаҙлығынан.* М. Ғафури. **Сыраҡҡа төшөү** төнөн сыраҡ яндырып, балыҡ сәнсергә барыу.

**3.** *һөйл.* Күҙҙең күреү һәләте; күҙ. **Сыраҡтан ҡалыу** (*йәки* **яҙыу)** күрмәй башлау, һуҡырайыу.

**4.** *әйл. ф.* **сырағым** кешегә иркәләп әйтелә. *Хат яҙған: «Батырҙарым, килегеҙ,— тип,— тукталмаҫтан атҡа менеп елегеҙ.— тип.— Сыраҡтарым, һеҙҙән ярҙам булмағанда, бөтөнләй харап була илебеҙ»,— тип.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**СЫРАҠСЫ** *и.* Сыраҡҡа төшөп балыҡ тотҡан кеше.

● *Сыраҡсыны суртан күрмәҫ.* Мәҡәл.

**СЫРАЛАНЫУ** *к.* Сыра-сыра булып ярылыу. *Сыраланып һынған ағас.*

**СЫРАЛАУ** *к.* Сыра итеп телеү. *Сәйәбикә .. сыралап, сыуал алдына киптерергә ҡуйған утындарын көлдөксәгә бушатты.* Т. Хәйбуллин.

**СЫРАЛЫҠ** *и.* Сыра өсөн тәғәйенләнгән ҡоро ағас. *Иртәнсәк тороу менән һылыуҙың килене мөйөштә һөйәүле торған сыралыкты ярып, нисек булһа ла сыуалды тоҡандырып ебәреү яйын ҡараны.* Т. Йәнәби.

**СЫРАМЫТЫУ** *к.* Кемгәлер оҡшатып йәки кемделер иҫкә төшөрөп, танығандай итеү; төҫмөрләү. *Ике кеше эшләп ултыра. Уларҙың икеһен дә мин, ҡасандыр, ҡайҙалыр күргән кешеләй, сырамыта төштөм.* С. Кулибай.— *Эйе, һине сырамытҡайыным да, кем тип әйтергә генә белмәй торам.* Н. Иҙелбай.

**СЫРАНТАЙ** *с. диал.* Сыр яланғас. *Сырантай бала. // Сырантай йөрөү.*

**СЫРҒА** *и.* Сәс, һаҡал ҡыра торған бәке.

**СЫРҒЫЯ** *и. иҫк.* Ҡыҙрас. *Мәҡаным минең ятҡан аты зиндан, .. сырғыя нисә төрлө — бары йыйылған.* Аҡмулла.

**СЫРҘАН** *и. диал.* Һырлан.

**СЫРҘЫ** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**СЫРҘЫЙ** *и. диал.* Селбәрә.

**СЫРҠ** *оҡш.* Ваҡ ҡош, сиңерткәнең өҙөк тауышын белдергән һүҙ. *Сырҡ итеү.* ■ *Сиңерткәләр сырҡ килеп, беҙҙе ҡотлап уйнайҙар.* А. Игебаев.

**СЫРҠ-СЫРҠ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат сырҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сырҡ-сырҡ итеү. Сырҡ-сырҡ һайрау.* ■ *Ағас ботаҡтарында сырҡ-сырҡ килеп әллә ниндәй ҡоштар һайраны.* Й. Солтанов. *Сырҡ-сырҡ сырҡылдай [сәпсек] бәҫле ботаҡҡа ҡунып.* Х. Түләкәев.

**СЫРҠЫЛДАТЫУ** *к.* Сырҡ-сырҡ иттереү, сырҡ-сырҡ килтереү. *Тауыҡтар себештәрҙе сырҡылдатып талай.* / Шуға оҡшаш тауыш сығарыу. *Көслө һауа тулҡыны көбәккә етеп килгән кешеләрҙе штрек стеналарына сырҡылдатҡансы һуҡты.* Я. Хамматов.

**СЫРҠЫЛДАУ** *к.* Сырҡ-сырҡ итеү, сырҡ-сырҡ килеү. *Сиңерткә сырҡылдай.* ■ *Мейес урынында туҙынып ятҡан ҡоромло кирбестәр аҫтында һыңар сиңерткә сырҡылданы.* Б. Бикбай. *Инәһен күргәс тә, [сыйырсыҡ балаһы] тишектән ярты кәүҙәһен сығарып, сырҡылдарға тотона.* М. Кәрим.

**СЫРҠЫЛДАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **сырҡылдау.** *Сырҡылдашып һайрау.*

**СЫРҠЫРАТЫУ** *к.* **1.** Өҙәләндереп ҡысҡыртыу, кешәнләтеү. *Һыбайҙар сыйырсыҡ тыуына ярып ингән ҡыйғырҙар төҫлө, йылҡыны сырҡыратып өйөрә.* М. Буранғолов. *Тауҙың үңерендә беҙҙең олатайҙар йәйләгән. Ҡороҡтарын һөйрәп, ҡаҙыҡ ҡағып, сырҡыратып ҡолон бәйләгән* (Халыҡ йырынан). / Нәҙек тауыш менән яңғыратыу. *Шул саҡ сырҡыратып ат кешнәне. Уның көмөш тауышы осһоҙ-төйөнһөҙ бер моңға ойошоп, аҡлан өҫтөнә осто.* Т. Килмөхәмәтов.

**2.** *диал.* Сырҡылдатыу. *Сырҡырата бәреү.* ■ *[Кәримдә] һөйгән ҡыҙын тансаға саҡырған егеттән үс алыу, яғаһынан тотоп башын сырҡырата һуғыу теләге тыуҙы.* Я. Хамматов.

**СЫРҠЫРАУ** *к.* **1.** Нәҙек тауыш менән өҙәләнеп, саҡырып кешенләү. *Йылҡы көтөүе һыу аръяғына, яланға сыға башлай. Уларҙың ҡолондары сырҡырай, бейәләре кешенләй, айғырҙары тибешә — сыр-сыу, саң-томан күтәрелә.* Һ. Дәүләтшина. *Бурыл бер аҙҙан сыҙамайынса сыр ҡырап ҡуя* (Әкиәттән).

**2.** *һөйл.* Өҙәләнеп, әрнеп илауға ҡарата әйтелә. *Сырҡырап илау.*

**СЫРҠЫРАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **сырҡырау.** *Ур ман эсенән сырҡырашып килеп сыҡҡан бейәләр өйөрөн күреп ҡала.* «Алдар менән Зөһрә».

**СЫРЛАҠ** *с. кар.* **сырылдаҡ.** *Һауала төрлө сырлаҡ ҡош .. сыр-сыу килә.* Ғ. Дәүләтшин.

**СЫРЛАМА** *и.* Йәймәнең уртаһын тишеп, табала майға ҡайнатып эсе ҡамырҙан бешергән йоҡа икмәк. *Фариза .. күпертеп бешерелгән сырламаларҙы .. һауыт-һауыт итеп батмуслы ашъяулыҡҡа теҙҙе.* Һ. Дәүләтшина. *Көндөҙ батшаның иң кесе ҡыҙы сырламалар бешереп, көтөүсегә аш килтерә* (Әкиәттән).

**СЫРЛАТМА** *и. диал.* Сөрөлдәп кенә аҡҡан. *Сүрәгәй өйрәк балаһы сырлатма йылға буйында* (Халыҡ йырынан).

**СЫРЛАТЫУ** *к. кар.* **соролдатыу** 2. *Шул арала теге малайҙарҙың береһе сырлатып һыбыҙғы һыҙғыртып ебәрҙе.* Р. Ғабдрахманов.

**СЫРЛАУ** [1] *к.* **1.** *кар.* **сырылдау** 1. *Сырлап осоу.* ■ *Елберләгән япраҡ аҫтында буҙ турғай бер мәртәбә моңланып ҡуйҙы сырлап.* Д. Юлтый.

**2.** Әкрен генә сөрләп ағыу (йылғаға, һыуға ҡарата). *Инйәр сырлап ҡына ағып ята.* М. Тажи.

**СЫРЛАУ** [2] *к. диал.* Һырлау. *Күлдәк итәген сырлау.*

**СЫРЛАУЫҠ** *и. диал.* Һабан турғайы (*кар.* **турғай**). *Ялан да ғына ерҙең сырлауығы һауаларға етмәй сырламай* (Халыҡ йырынан).

**СЫРМАЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **сырмалау.** *Тауыш килгән яҡҡа барһалар — нимәгәләр сырмаланып, ыскына алмай йөҙәгән сәмрәгош була* (Әкиәттән).

**СЫРМАЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **сырмалау.**

**СЫРМАЛАУ** *к.* Ҡабат-ҡабат уратып сырмау. *Сырмалап бәйләү. Сырмалап ташлау.*

**СЫРМАЛСАН** *с. диал. кар.* **сырмалсыҡ** [2].

**СЫРМАЛСЫҠ** [1] *и.* Сырмалып, үрмәләп үҫкән оҙон һабаҡлы сүп үләне. *Урман сырмалсығы.* ■ *Сырмалсыҡ менән бик ныҡ аралашҡан булһа ла, арыш уңған ине.* Х. Ғиләжев.

**СЫРМАЛСЫҠ** [2] *с.* Ныҡ буталып, аңлауы ҡыйынлашҡан (эш-хәлгә ҡарата). *Сырмалсыҡ эш.* ■ *Уйҙар, уйҙар... Юламановтың сырмалсыҡ уйҙары.* Я. Вәлиев. / *и. мәғ.* Буталсыҡ, аңлауы ҡыйын хәл. *Мөхәббәт кешегә эшендә дәрт өҫтәй, илһам бирә, тиҙәр. Ә ул [Шәмсун] әллә ниндәй сырмалсыҡҡа инеп буталды.* Н. Мусин.

**СЫРМАЛЫУ** [1] *к.* **1.** *төш. кар.* **сырмау** [1]. *Башы сырмалған мулланы ҡырандасҡа һалып, атын ауыл яғына бороп ебәрҙе[ләр].* Я. Хамматов.

**2.** Нимәнеңдер араһына инеп буталыу, нимәгәләр уралыу (ғәҙәттә үҫемлектәргә ҡарата әйтелә). *Бынан бер нисә тиҫтә миллион йыл элек хәҙерге Башҡортостан ерендә тропик климат булған, .. ҡотороп, бер-береһенә сырмалып, тропик ағастар үҫкән.* Д. Бураҡаев. *Был дегәнәк күл аша сығып, Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу ҡәбере өҫтөнә үҫкән алма ағасына сырмалды, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**СЫРМАЛЫУ** [2] *к. кар.* **солғаныу.** *Ҡырҙар нурланған, бөтә ер-күге нурға сырмалған.* Ш. Бабич.

**СЫРМАТЫУ** *к. кар.* **сырмау** [1]. *Сырматып бәйләү.*

**СЫРМАУ** [1] *к.* **1.** Тирә-яҡтан уратып алыу, уратып үҫеү. *Ҡурай еләге һабаҡтары, шомбоя сырмап ташлағанлыҡтан, .. бына-бына һәләк булабыҙ тигәндәй, һерәйешеп ултыралар.* Р. Ғабдрахманов. *Алма ағасын сырмаған дегәнәктән ике ҡарға сығып, теге ике ҡоштоң ояһын туҙҙыра башланы, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** Еп йәки башҡа берәй нәмә менән ян-яҡтан ҡат-ҡат уратыу, уратып-уратып бәйләү. *Сырмап бөтөрөү. Сырмап ташлау. Аяҡ-ҡулды сырмау.* ■ *Ҡулаҡтар уны [Морат ағайҙы] урманда аңдып тороп үлтергәндәр ҙә, дилбегәһе менән сырмап, бер ҡарағай ботағына аҫып ҡуйғандар.* М. Тажи. *Мөғәллимәнең аяғында бау менән сырмап бәйләгән оҙон ҡуныслы, бейек күтәрмәле ҡара ботинка.* З. Биишева.

**СЫРМАУ** [2] *к. кар.* **солғау** 1, 2. *Гөльямалдың йөрәген ҡурҡыу сырмап алды, ҡапыл ағарынды.* Я. Хамматов. *Сырмап алған ер йөҙөн бер эс бошоргос гәмле көй.* Ш. Бабич.

**СЫРМАУ** [3] *и.* Нимәнелер сырмаған бау. *Йөктөң сырмауын тағатыу.*

**СЫРПАҠЛАНЫУ** *к. кар.* **сәрпәкләнеү.** *Сырпаҡланып һыныу.* ■ *Сергей имән түмәрен ярмаҡсы булды. Түмәр, ахырыһы, күптән яткан, ян-яғы сырпаҡланып бөткән.* Р. Низамов.

**СЫРПАҠЛАУ** *к. кар.* **сәрпәкләү.** *Ағасты йәшен атып сырпаҡлаған.*

**СЫРПЫ** *и. диал. кар.* **сытыр** [1]. *Сырпы өйөмө. Сырпы йыйыу. Сырпы яғыу. // Сырпы уйын.*

**СЫРПЫҠ** *и. диал.* Тағара.

**СЫРСА** *и. диал. кар.* **сыр** [2].

**СЫР-СЫР** *окш.* Ҡабат-ҡабат сыр [4] иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сыр-сыр итеү. Сыр-сыр ҡысҡырыу.* ■ *Ҡоштар сыр-сыр килешеп, күтәрелә һауаға.* Ф. Рәхимғолова. *Һарайҙағы сыбар тай сыр-сыр кешенләй* (Әкиәттән).

**СЫР-СЫУ** *и. йыйн.* Шаулашҡан ығы-зығы, сыр-сыр тауыш. *Сыр-сыу ҡупты. // Сыр-сыу тауыш аҫтында.* ■ *Китеүселәр аҙаҡҡы тапҡыр күрешеп, оҙатыусыларҙың сыр-сыуы аҫтында арбаларға, ҡырандастарға таралып ултырҙы.* Һ. Дәүләтшина. *Уны [Емеште] аҡсарлаҡтар сыр-сыуы ҡаршыланы.* З. Биишева. **Сыр-сыу килеү** күмәкләп ҡысҡырышыу; шаулашыу. *Сыр-сыу килеп йөрөү. Сыр-сыу килеп уйнау.* ■ *Баш осонда аҡсарлаҡтар осалар сыр-сыу килеп.* Ш. Бикҡо.

**СЫР-СЫУЛАШЫУ** *к.* Сыр-сыу килеп шаулашыу. *Урамда балалар сыр-сыулашып тау шыуа.* Р. Низамов. *Ығы-зығы килеп, сыр-сыулашып һыу буйҙарында ҡарға буткаһы байрамдарын ойоштороуҙар онотолмай.* Х. Назаров.

**СЫРТ** [1] *р.* Ныҡ итеп ҡыҫып (күҙҙе йомоуға ҡарата). *[Ҡатын] күҙҙәрен сырт йомоп кәмәнең ситенә тотондо. Ел ҡоторонғандан ҡоторондо.* И. Абдуллин.

**СЫРТ** [2] *окш.* **1.** Теш аша төкөргәндә, ҡоро ағас һынғанда һ. б. шартлап сыҡҡан нәҙек тауышты белдергән һүҙ. *Сырт итеү. Сырт иттереп төкөрөү. Сырт итеп һыныу.*

**2.** *кар.* **сылт** [1]. *Ғариф ағай .. үҙенең ҡайыш-майыш тегенгәндә ҡуллана торған ҡоралдарын эшкә ҡушҡас ҡына, портфель сырт итеп асылып китте.* Б. Бикбай.

**СЫРТЛАҠ** *и.* Бер-береһенә батырып эләктерә торған бәләкәй генә түңәрәк ҡаптырма. *Иҙеү*

*сыртлағы. Сыртлаҡлы көлдәк. Еңгә сыртлаҡ ҡуйыу.*

**СЫРТЛАТЫУ** *ҡ.* Сырт [2] иттереү. *Сыртлатып төкөрөү.* **Тел сыртлатыу** телде өҫкө аңҡауға ҡағып сарт иткән тауыш сығарыу; тел сартлатыу.

**СЫРТЛАУ** *ҡ.* Сырт [2] итеү, сырт-сырт килеү. *Ҡоро сыбыҡ сыртлап һынды, бүгәй, түгелме шул аяҡ тауышы?* Т. Морат. *Икебеҙ ҙә сыбыҡтарҙың сыртлап янышына мәрәкә итеп ҡарап ултырабыҙ.* Ғ. Аллаяров.

**СЫРТ-СЫРТ** *окш.* Ҡабат-ҡабат сырт [2] иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сырт-сырт итеү. Сырт-сырт төкөрөү. Сырт-сырт һыныу. Сырт-сырт яныу.* ■ *Шығырлап туңған тәҙрәләр сырт--сырт килә лә шартлай.* Т. Йосопов.

**СЫРТЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Сырт-сырт иттереү. *Сыртылдатып төкөрөнөү.* ■ *Айбулат кеҫәһенән зажигалка сығарҙы. Ул да, әллә нисә ҡабат сыртылдатып сирткәс кенә, саҡ тоҡанды.* Һ. Дәүләтшина.

**СЫРУР** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк. кит.* Шатлыҡ, кинәнес. *Эй йәмәғәттәрем, әй күҙемдең нурҙары, күңелемдең сырурҙары, һеҙҙе һәм үҙемде яратҡан бер хоҙайыма тапшырҙым.* «Батыршаның хаты».

**2.** (баш хәреф менән) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**СЫРХАУ** [1] *ҡ.* Һыҙып ауырыу. *Бөрөк ҡарт сырхап тороу сәбәпле, йыйынға барырға хәлем юҡ, тигән.* Ж. Кейекбаев.

**СЫРХАУ** [2] [*фарс.*] *и.* **1.** Һыҙып ҡына ауыртҡан дауамлы сир. *Миндә ул ҡағылған сырхау. Ҡағылған сырхауҙы киҫеп кенә быргап булмай»,— тине Мөстәким ҡарт.* С. Кулибай. *Һәр кемдең сырхауы бер гилләттер, тотош милләт сырхауы яһиллыҡтыр.* М. Ғафури. **Сырхау ҡағылыу** (*йәки* **тейеү**) ниндәйҙер сиргә дусар булыу, сирләү.

**2.** *с. мәғ.* Гел ауырыған, ауырыуҙан башы сыҡмаған. *Сырхау кеше. Сырхау булыу.* ■ *[Сәхипъямал:] Ауырыйым бит, Хәлимов ағай. Сир йонсота. Сырхаумын.* Ш. Насыров. *Һаҡалмыйыҡ баҫҡан зәғиф, сырхау кешеләр уны [Хисмәтулланы] уратып алды.* Я. Хамматов. // *Палатала яңғыҙ сырхау ята, ауыр булһа кәрәк бик эше.* Ғ. Әмири.

**СЫРХАУЛАНЫУ** *ҡ.* Сырхауға [2] (2 мәғ.) әйләнеү, сырхау булыу; ауырыуға һабышыу. *Сырхауланып китеү.* ■ *Ил һүҙен аяҡ аҫтына йыға тип үйламағыҙ, мин инде олоғайғанмын, сырхауланғанмын* (Әкиәттән).

**СЫРХАУЛАУ** *ҡ.* Һыҙып ауырыу. *Сырхаулап йөрөү.* ■ *[Мәрәһимдең] бисәһе сырхаулап тора икән,— тине Сәлих ағайым.* М. Кәрим.

**СЫРХЫУАТ** *и.* Йоғошло яман тире ауырыуы. *Сырхыуат ҡағылыу.*

**СЫРХЫУАТЛЫ** *с.* Сырхыуат менән сирләгән, сырхыуат йоҡҡан. *Сырхыуатлы кешеләргә бик килеште — булдылар аяҡ-ҡулы һыҙланмаҫтай.* Аҡмулла.

**СЫРЫЛДАҠ** *с.* **1.** Сыр-сыр итеп ҡысҡырған. *Сырылдаҡ турғай.*

**2.** Әҙ генә тейгәнгә лә ғауғалап барған. *Сырылдаҡ ҡыҙ.*

**СЫРЫЛДАТЫУ** *ҡ.* **1.** Сыр-сыр иттереү, сыр-сыр килтереү. *[Бәкер:] Беҙҙең ротаның бер дневальныйы һыбыҙғыһын сырылдата башланы.* А. Таһиров.

**2.** Сыр-сыр ҡысҡыртыу, сыр-сыу килтереү. *Балаһы сырылдатыу. Сырылдатып ҡысҡыртыу.* ■ *[Хәҙисә — Зөфәргә:] Мин атайың урынында булһам, һине сырылдатып, .. тал сыбығы менән һыптырып, .. ҡайтарыр инем.* С. Кулибай.

**СЫРЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Сыр-сыр итеү, сыр-сыр тигән тауыш сығарыу, сыр-сыр килеү. *Сиңерткә сырылдай.* ■ *Ике турғай оя эсенән сыҡты ла, өй башына ултырып сырылдарға тотондо.* Ғ. Әмири. *Сәпсек китергә уйламаны ла. .. Тағы сырылдарға тотондо.* В. Исхаҡов. *Сыр, сыр сырылдай бала ҡош тал төбөндә.* Т. Йәнәби.

**2.** Әсе тауыш менән ғауғалап ҡысҡырыу. *Әсәһенең илағанын күреп, бер нәмә аңламаған Зифа сырылдарға тотондо.* Я. Вәлиев. *Үндә бер балаң сырылдай, бында береһе зар илай.* Ш. Бабич.

**СЫРЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **сырылдау.** *Тур ғайҙар сырылдаша.* ■ *Мейес артында йән биҙҙереп, туҡтауһыҙ сиңерткәләр сырылдаша.* З. Биишева.

**СЫРЫМ** *и. диал.* Серем. *Сырым итеү. Сырымға китеү.*

**СЫРЫШ** *и.* **1.** Бит, ҡулдағы ваҡ ҡына булып йыйырылған һырҙар; йыйырсыҡ. *Биттәге сырыш // Сырыш бит.* ■ *Муйылбикәнең .. күҙ тирәләрендә яҡшы уҡ беленә башлаған сырыштары йәш сағында матур ғына булғанын әйтеп тора.* Һ. Дәүләтшина. *[Әминә:] Ҡайтып, ҡайһылай арыу иттең әле, улым,— тине, сырыш баҫҡан ҡаҡса битендәге тирҙе һөртөп.* Н. Мусин.

**2.** *һөйл.* Ойпаланыуҙан, йомарланғандан барлыҡҡа килгән һыр. *Итәктең сырышын һыпырып төҙәтеү. // Сырыш күлдәк. Сырыш салбар*

**СЫРЫШЛЫ** *с.* Сырыш баҫҡан, сырыш (1 мәғ.) ҡаплаған, сырышы күп булған.

**СЫРЫШТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Сырышлы итеү, йыйырсыҡландырыу. *Эткол бай мыйыҡтарын йыш-йыш ҡына бора-бора күҙ ҡойроҡтарын сырыштырыбыраҡ ҡупайып ултыра.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *һөйл.* Ойпалап, йомарлап таушалдырыу. *Салбарын сырыштырып бөткән.*

**СЫРЫШЫУ** *ҡ.* **1.** Сырышлыға әйләнеү, сырыш менән ҡапланыу; йыйырсыҡланыу. *Хөббөниса абыстайҙың сикәләре сырышып, һаҡал сәстәренә сал ингән.* Т. Хәйбуллин. *Йәш ваҡытта һәр кем матур була, ә ҡартайғас йөҙө сырыша* Б. Вәлит.

**2.** *һөйл.* Ойпаланып бөтөү, йомарланыу, таушалыу. *Сырышҡан күлдәк.* ■ *Ҡыш һаҡларға һалып ҡуйылған кейемдәрҙе сырышҡан, йыртылған йәки төймәләре төшкән килеш ҡалдырырға ярамай.* «Совет Башҡортостаны», 1970 2 декабрь.

**СЫРЬЁ** [*рус.*] *и.* Төрлө юл менән табылған булдырылған һәм нимәлер эшләү өсөн тәғәйенләнгән материал. *Минераль сырьё. Химия сырьё.* ■ *Көйөргәҙе күмере химия өсөн сырьё булыу яғынан ҙур әһәмиәткә эйә.* М. Хисмәтов.

**СЫСАЙЫУ** *ҡ. диал.* Сусайыу.

**СЫСАНЛАУ** *ҡ. диал.* Сусанлау.

**СЫСҠАН** *и.* Ослo моронло, яланғас оҙон ҡойроҡло бәләкәй генә кимереүсе йәнлек. *Баҫыу сыҫҡаны. Ҡом сыҫҡаны. Ҡыр сыҫҡаны. Өй сыҫҡаны. Урман сыҫҡаны. Сыҫҡан балаһы. Сыҫҡан ояһы.* ■ *[Бурала] асыҡҡан сыҫҡандар ғына хөкөм һөрә ине.* Ғ. Дәүләтшин. *Бесәй мөйөштә бер сыҫҡан йөрөгәнен һиҙеп ҡалған* (Әкиәттән). **Йылҡы сыҫҡаны** ҡара күкһел төҫтәге ваҡ сыҫҡан.

♦ **Ләпәк сыҫҡан** *диал. кар.* **Һуҡыр сыҫҡан. Оло** (*йәки* **эре**) **сыҫҡан** осло моронло, яланғас ҡытыршы оҙон ҡойроҡло, күкшел һоро түҫтәге шырт йөнлө, сыҫҡандан эре кимереүсе йәнлек; ҡомаҡ. **Сыҫҡан боросо** *бот.* ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған ҡыйғас-ҡыйғас селтәр япраҡлы, ялһыу йәки аҡ төҫтәге сатыр сәскәле ҡуҙаҡлы үлән. **Сыҫҡанға үлем, бесәйгә көлкө** берәүгә бер бәлә булып, икенсе берәү шаярғанда әйтелә. *[Айытбай:] Сыҫҡанға үлем, бесәйгә көлкө, тигән кеүек, юҡ урында шаяраһың, Хәлкәс ағай.* С. Агиш. **Сыҫҡан йылы** ун ике йыллыҡ мөсәлдең беренсе йылы. *Аҡһаҡ Тимер хан килде. .. Сыҫҡан йылында, гәкрәп йондоҙоноң икенсе көнөндә Ҡазан шәһәрен алды.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960. **Сыскаи типкес** *кар.* **торомтай. Сыҫҡан үрте** *шул уҡ* **ҡуян үрте** (*кар.* **үрт.**) **Сыҫҡан һырт** һырт буйы ҡара һыҙатлы булған ҡола ат төҫө. *Егет күлдең шаулауына аптырап ҡараһа, гел бер төҫлө сыҫҡан һыртлы ҡола мал ер йөҙөн ҡаплап алған, ти.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». **Һуҡыр сыҫҡан** ер аҫтынан юл йырып йөрөй торған осло моронло, тарбаҡ ҡыҫҡа аяҡлы, ләпәк кәүҙәле ваҡ йәнлек. *[Ҡапҡанға] йып-йылтыр ҡара йөнлө һуҡыр сыҫҡан эләккән.* Н. Мусин.

**СЫСҠАНҠОЙРОҠ** *и.* Оҙонса ваҡ япраҡлы һабаҡ осонда теҙелеп торған ваҡ ҡына алһыу йәки зәңгәр күк сәскәле ҡыр үләне.

**СЫСҠАНСЫҠ** [1] *и.* **1.** Һыйыр малының ҡорһағына биҙ һымаҡ төйөн ҡалҡып, эсен таштырған сир. *Сыҫҡансыҡ, булһа, һыйыр малында була, йылҡыла булмай.* Я. Хамматов.

**2.** *диал. кар.* **һаҡау** [2]. *Атымдың муйынына сыҫҡансыҡ сыҡҡан.*

**СЫСҠАНСЫҠ** [2] *и. диал.* Торомтай.

**СЫСҠАНСЫҠЛАУ** *ҡ.* Сыҫҡансыҡ [1] менән ауырыу.

**СЫСҠАНСЫЛАУ** *ҡ.* Сыҫҡан аулау. *Төлкө сыҫҡансылай.* ■ *Үҙәк эстәрендә сыҫҡансылап ҡыш уҙғара торған билал .. күренмәй.* Ғ. Дәүләтшин.

**СЫТ** [1] *и.* Ел һуҡҡан яҡтан ышыҡ булһын өсөн талдан, ҡабыҡтан йәки һаламды ҡыҫып эшләнгән ҡойма. *Сыт тотоу.*

**СЫТ** [2] *и. диал.* **1.** *кар.* **мәрке** 1. *[Ҡатын] сыттан ун биш башлап ҡорот .. индерҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Талдан үргән тауыҡ, ҡаҙ ояһы.

**СЫТ** [3] *оҡш.* Ҡүҙҙе ҡапыл йомоп асҡанды белдергән һүҙ. *Ҡая таш өҫтөнән тулҡынға һикергәндә кеше күҙен сыт йома.* Ш. Янбаев.

♦ **Сыт та итмәй** 1) аптырар, ғәжәпләнер, юғалып ҡалыр һ. б урында иҫе лә китмәгән кешегә ҡарата әйтелә. *[Ғәзимә:] Үҙе иламай ҙа бит әле, сыт та итмәй һинең ҡорогороң.* Һ. Дәүләтшина; 2) күҙҙе алмай, текләп. *Миңлегөл ике сикәһенеән ҡыҫып, Буранбайҙы үҙенәрәк тартты. Сыт та итмәй уға баҡты.* Т. Килмөхәмәтов.

**СЫТАЙТЫУ: йөҙҙө сытайтыу** ризаһыҙлыҡ белдереп төҫтө боҙоу, йөҙҙө сирылтыу. *[Рәхимә эбей] гүмерендә беренсе тапҡыр йөҙөн сытайтып: «— Уф!» — тине.* К. Мәргән.

**СЫТАЙЫУ** *ҡ.* Нимәнелер яратмағандан, оҡшатмағандан төҫ боҙоу, йөҙ сирылыу. *Сытайып ҡарау.* ■ *Рәшиҙә әбей сытайып ҡуйҙы, сөнки уның дарыу яратмай торған гәҙәте бар.* К. Мәргән. *[Алукин] үҙенең ҡурҡыуын йәшерергә тырышып, йылмайырға теләне, ләкин .. йөҙө сытайҙы.* Х. Мохтар.

**СЫТРА** *и.* Алтын-көмөштән биҙәкләп, семәрләп, уртаһына ҡаш ҡуйып яһаған биҙәүес. *Сытралы ҡалпаҡ.* ■ *Ҡарт миңә .. көмөш сытралы, ысын аҡыҡ ҡашлы, баштарына егерме бишәр тинлек иҫке тәңкә таҡҡан ҡуш сулпы сығарып бирҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**СЫТРАЙ** *с. диал. кар.* **тнçкәре** 3.

**СЫТРАЙЫУ** *ҡ.* Ауыртыныу, ытырғаныу, көсәнеү һ. б. сәбәптән төҫ боҙолоу, йөҙ сирылыу. *Сытрайып күтәреү. Сытрайып ҡына атлау.* ■ *Әрем эсеһенә лә кешенең йөҙө шулай сытраймаҫ.* Ш. Янбаев. *Күҙен йомған сабый .. сытрайып, тешһеҙ ауыҙын сапылдатып ҡысҡыра.* Я. Хамматов.

**СЫТ-СЫТ** [1] *оҡш.* Күҙҙе ҡапыл-ҡапыл йомоп асҡанды белдергән һүҙ. *Сыт-сыт итеү. Күҙҙе сыт-сыт йомоу.*

**СЫТ-СЫТ** [2] *оҡш.* Шыҡылдап йәки сылтырап сыҡҡан йомшаҡ тауышты белдергән һүҙ. *Сыт-сыт итеү. Сыт-сыт килеү. Сыт-сыт счёт төймәһен тартыу.*

**СЫТЫЙЫУ** *ҡ. диал.* Сытайыу.

**СЫТЫҠЛАНЫУ** *ҡ. диал.* Ҡылансыҡланыу.

**СЫТЫЛДАТЫУ** [1] *ҡ. һөйл.* Сыт-сыт [1] иттереү, сыт-сыт йомоу. *Яубаҫар бүреген ҡалҡытты һәм бәләкәй йылтыр күҙҙәрен сытылдатып алды.* Р. Низамов.

**СЫТЫЛДАТЫУ** [2] *ҡ. һөйл.* Сыт-сыт [2] тигән тауыш сығарыу, сыт-сыт килтереү. *Сытылдатып һуғыу.*

**СЫТЫЛДАУ** *ҡ. һөйл.* Сыт-сыт [2] итеү, сыт-сыт килеү; сыт-сыт бәреү, һуғыу. *Хәтмулла сытылдап сәй ҡайнағанлығын .. ишетеп тора.* Д. Исламов. *Канцелярияла счёт төймәләре генә сытылдай.* С. Агиш.

**СЫТЫР** [1] *и.* Ваҡ ҡыу ағас; ағас ботаҡтары. *Сытыр өйөмө. Сытыр йыйыу. Сытыр яғыу.* ■ *Ағас төптәрендәге ҡоро сытыр уның [Азаматтың] ҡалын табанлы итеге аҫтында сыртлап һына.* Ҡ. Даян. *Быҫҡып янған утты осраттым да ҡорорағын һалдым сытырҙың.* Я. Ҡолмой.

**СЫТЫР** [2] *оҡш.* Ҡоро ваҡ ағас һынғанда, йоҡа беше әйбер йыртылғанда сыҡҡан йәки шуға оҡшаш бүтән төрлө сағыу тауышты белдергән һүҙ. *Сытыр итеү. Сытыр итеп йәшен атты.*

**СЫТЫРЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** Сытыр-сытыр иттереү, сытыр-сытыр килтереү. *Күк күкрәтеп, ер тетрәтеп йәшен сытырлатып үпте тау битен.* Н. Нәжми.

**2.** Хәл ҡылымдың *≠п* формаһында «бик нык итеп, нык ҡыҫып, ҡымтып» тигән мәғәнәне аңлата. *Күҙҙе сытырлатып йомоу.* ■ *Хәтимә йүгереп барып, малайҙы сытырлатып тотоп алды.* Р. Ғабдрахманов. *Фатиманың .. ҡулдары шәлен сытырлатып түшенә ҡыҫҡандар.* Б. Бикбай.

**СЫТЫРЛАУ** *ҡ.* **1.** Сытыр-сытыр итеү, сытыр--сытыр килеү. *Бер нисә йыл буйы кибеп торған йыла сытырлап яна башланы.* Ж. Кейекбаев. *Тупка .. сытырлап пулемёттар ялған алып китә.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *күсм. һөйл.* Хәл ҡылымдың *≠п* формаһында «тотлоғоп тормай» тигән мәғәнәне аңлата. *Русса сытырлап тора.*

**СЫТЫРЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **сытырлау.**

**СЫТЫРЛЫК** *и.* Сытыр [1] күп ер. *Сытырлыҡ араһы.*

**СЫТЫРМАН** [1] *и. диал.* Шырлыҡ. Сытырманға инеү.

**СЫТЫРМАН** [2] *р. диал. ҡар.* **сат** [2]. *Сытырман йәбешеү.*

**СЫТЫР-МЫТЫР** *и. йыйн.* Йыйып өйөлгән ваҡ-төйәк ағас, ағас ботаҡтары. *Сытыр-мытыр ягып, ҡула менән тамаҡтарына бешерәләр.* Ж. Кейекбаев.

**СЫТЫР-САТЫР** *и. ҡар.* **сытыр-мытыр.** *Камил .. сытыр-сатыр өйөмөнә яҡын килде.* Ф. Иҫәнғолов.

**СЫТЫР-СЫТЫР** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат сытыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сытыр-сытыр итеү. Сытыр-сытыр һыныу. Утын сытыр-сытыр килеп яна.* ■ *Өйгә инһәм, өй эсем ҡараңғы, сытыр-сытыр сыра янһа ла* (Халыҡ йырынан).

**СЫТЫРЫҠ** *и. диал. ҡар.* **сытыр** [1].

**СЫУ** *и.* Мал ҡарынындағы бала ята торған төргәк; сыуын. *[Сәйҙеямал:] Һыйырҙың оргасы быҙауы бар. Сыу һалғанын көтөп оҙаҡлап киттем.* Я. Хамматов.

**СЫУАҒАЙТЫУ** *ҡ.* **1.** Сыуаҡҡа әйләнеү. *Ямғырҙан һуң көн йәнә сыуағайтты.* Я. Хамматов.

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **сыуағайыу.** *Көндө сыуағайтты. Сыуағайтып ебәрҙе.*

**СЫУАҒАЙЫУ** *ҡ.* Сыуаҡ (II 1 мәғ.) булыу, сыуаҡҡа әйләнеү. *Көн сыуағайҙы.*

**СЫУАҒЫТЫУ** *ҡ. ҡар.* **сыуағайтыу.**

**СЫУАҠ** I *и.* **1.** Асыҡ ҡояш яҡтыһы. *Көн сыуағы.* ■ *Күктең йөҙө зәңгәр, бер болот юҡ, йылы сыуаҡ ҡарҙы иретә.* Б. Вәлит. *Тәҙрәм астым, сыуаҡ төштө, ҡыҙыл нурҙарын сәсте* (Халыҡ йырынан).

**2.** Яҙ йәки көҙ көнөндәге ҡояш төшөп торған ышыҡ йылы урын. *Көҙ сыуағы. Сыуаҡҡа сығыу. Сыуаҡта ултырыу.* ■ *Ана, бала-саға ҡояш битенә сыуаҡҡа сығып, әүеҫлек башына менеп, ҡурсаҡ уйнай.* Т. Йәнәби. *Ҡыуаҡтар ҙа шәлен һала кеүек, тик ҡыҙыныр өсөн сыуаҡта.* Р. Бикбаев.

II *с.* **1.** Асыҡ ҡояшлы, аяҙ. *Сыуаҡ көн. Сыуаҡҡа әйләнеү.* ■ *Быйыл йыл һәйбәт килә. Бер-ике көн сыуаҡ булып тора ла, күк күкрәп, ямғыр яуып уҙа.* Ә. Вәли. *Көндәр һаман, йәй аҙағындағы һымаҡ, сыуаҡ, йылы.* Б. Бикбай.

**2.** *күсм.* Ҡайғы-хәсрәтһеҙ, шат; асыҡ, көләс (йөҙгә ҡарата). *Һин һәр ваҡыт шат күңелле, һәр саҡ сыуаҡ йөҙлө булдың.* Ә. Зәйнуллин. *Йәмле лә һуң беҙҙең иркен илдә, йәшәү рәхәт, сыуаҡ көнөбөҙ.* Н. Иҙелбай.

◆ **Әбей(ҙәр) сыуағы** көҙ башындағы аяҙ йылы көндәр. *Көҙгө ямғырҙар башланды, уның артынан әбейҙәр сыуағы килде.* С. Агиш.

**СЫУАҠЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *ҡар.* **сыуаҡлау** 1. *Көндәр сыуаҡланды.*

**2.** *күсм.* Күңел асылып хисләнеү. *Кәйефем дә бөгөн, болотһоҙ зәңгәр һауалы күк һымаҡ, сыуаҡланып тора ине.* С. Ҡудаш.

**СЫУАҠЛАУ** *ҡ.* **1.** Сыуаҡҡа, аяҙға әйләнеү, сыуаҡ булыу. *Көн сыуаҡлап, йылытып ебәрҙе.* Ғ. Ғүмәр. *Ҡапыл сыҡҡан ямғыр үтеп китте. Яңынан сыуаҡлап ебәрҙе.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Көн битендә, ҡояшта йылыныу. *Сыуаҡлап тороу.* ■ *Нигеҙ буйында сыуаҡлап ултыра инем, тағы әсәйемдең тауышы ишетелде.* Н. Мусин.

**СЫУАҠЛЫ** *с. ҡар.* **сыуаҡ** II. *Сыуаҡлы көн.* ■ *Йомарт сыуаҡлы, зауыҡтырғыс яҙ миҙгеле ине.* М. Тажи.

**СЫУАЛ** *и.* Утынды һөйәп яға торған ҙур ауыҙлы, тура мөрйәле элекке мейес. *Сыуал алды. Сыуал мөрйәһе. Сыуал яҡтыһы. Сыуалға ягыу.* ■ *[Килене:] Ҡәйнәм, .. өйгә мейес тә сығартайыҡ, гел генә сыуал менән ҡыйын бит, бер нәмә бешереп булмай.* Т. Йәнәби. *Мин өшөргәнеп уяныу киттем. Сыуал уты күптән һүрелгән, өй һыуыған ине.* С. Кулибай.

**СЫУАЛАНЫУ** *ҡ. ҡайт. ҡар.* **сыуалыу** 1—4. *Сәс сыуаланып бөткән.* ■ *Урамдағы хәлде күргән Хажисолтан байҙың бисәләре, бер-береһенә ҡарата насарлыҡтарын онотоп, өй эсендә сыуаландылар.* Я. Хамматов.

**СЫУАЛСЫҠ** **1.** *с.* Сырмалып бөткән, аралашып буталған. *Сыуалсыҡ еп.* ■ *Сыуалсыҡ бер йомғаҡ һымаҡ кешенең был ғүмере.* Р. Ғарипов. / *күсм.* Билдәле бер тәртибе булмаған, аңлайышһыҙ; буталсыҡ. *Сыуалсыҡ уй.* ■ *Улар [журналистар] кешегә, уның хеҙмәтенә бәйле күп сыуалсыҡ мәсьәләне ҡәләм осона ала.* Ә. Вахитов.

**2.** *и.* Буталсыҡ, аңлайышһыҙ, әҙмә-әҙлекһеҙ хәл. *Тормош сыуалсығы.*

**СЫУАЛТЫУ** *ҡ.* **1.** Аралаштырып бутау; сырмалтыу. *Епте сыуалтыу.* ■ *[Атаһы — Вәлигә:] Ҡара һин, ашығып, ҡулыңды киҫеп ҡуйма, сыуалтмай [игенде] яҡшы урып өйрән.* М. Ғафури. *[Ҡыҙ] гинуар еле сыуалтҡан сәстәрен автомобилдең ҡара быялаһына төшкән шәүләһенә ҡарап төҙәт[те].* Ғ. Ғүмер.

**2.** *күсм.* Билдәле бер тәртипте юғалтып, буталсыҡ хәлгә килтереү; бутау (фекергә һ. б. ҡарата). *Башты сыуалтыу. Фекерҙе сыуалтыу. Эште сыуалтыу.* ■ *«Иркенлек, тигеҙлек, берлек» кеүек һүҙҙәрҙең ҡапыл ишеткән саҡта ҡолаҡҡа ягымлы яңғырауы ҡайһы бер кешеләрҙең мейеләрен сыуалтты.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *күсм.* Эҙҙе, юлды яңылыштырыу, бутау. *Балаһынан ҡасып йөрөй икән [ул кеше], алименттан эҙен сыуалтты.* Ҡ. Даян. *Хәйләкәр шул төлкөһө лә — юлын сыуалтты.* Ш. Ғәлин.

**СЫУАЛЫУ** *к.* **1.** Тәртипһеҙ аралашып буталыу; сырмалыу. *Сыуалған сәс.* ■ *Улар [ҡыр ҡаҙҙары] талған ҡанаттарын, сыуалған йөндәрен суҡыштары менән рәтләйҙәр, ҡағыналар.* М. Ғафури. *[Сәғиҙәнең] сәсе ҡалай оҙон, ятҡан саҡта муйынына сыуалмай микән?* М. Тажи.

**2.** Кем йәки нимәлер тирәһендә уралып йөрөү; уранғылау. *[Ҡушай — Ишәйгә:] Һин бит кухня тирәһендә йышыраҡ сыуалаһың давай, булыш әле, малай.* С. Кулибай. *Ошо көндән һуң ул [Таһир] ат тирәһендә сыуала башланы.* К. Мәргән. / Ҡайҙалыр буталып йөрөү, ҡамасаулау. *[Әсә — балаларына:] Ултырып тамағығыҙҙы туйҙырығыҙ ҙа, кеше килгәс, табын тирәһендә сыуалмағыҙ.* З. Ғәлимов.

**3.** *күсм.* Ниндәйҙер эш-шөғөл менән нык мәшғүл булыу, мәшәкәтләнеү. *Баҡса эше менән сыуалыу. Сауҙа менән сыуалыу.* ■ *Тормош мәшәкәте менән сыуалып, сәсемде ҡар, ямғыр һыуы менән йыуып торорға ла ваҡытым юк.* М. Садыҡова.

**4.** Кем менәндер аралашыу, бәйләнештә, мөнәсәбәттә булыу. *Колчаксылар менән сыуалыу.* ■ *[Хәлити — Сафияға:] Уның [Шоңҡарҙың] янында сыуалырға тырышыусылар күп булыр. Береһен яҡын ебәрмә.* Ә. Атнабаев. / *күсм.* Ғишҡи мөнәсәбәттә булыу, йөрөү. *[Тимерйән:] Сөйөмбикәгә ни булған? [Ғиндулла:] Ни булһын! Һине көтөп ултыраһы килмәгән, кем менәндер сыуалған.* Ш. Янбаев. *[Хәкимов] уңманы малайҙарҙан: эскегә һабыштылар, бисә-сәсә менән сыуалдылар.* Б. Бикбай.

**5.** Әҙмә-әҙлекле тәртипте юғалтыу, буталсыҡ хәлгә килеү; буталыу (фекергә һ. б. ҡарата). *Баш сыуала. Фекер сыуала.* ■ *[Тимеркәйҙең] уйҙары сыуалды, башы эшләмәй башланы.* Д. Юлтый. *Комсомолкам иҫемә төшһә, бөтә зиһенем сыуала* (Халыҡ йырынан).

◆ **Мыйыҡ сыуалыу** *кар.* **мыйыҡ.**

**СЫУАЛЫШ** *и.* **1.** Шау-шыулы, ығы-зығылы ваҡиға; бола. *Автоматтар уҙ эшенә тотонодо. Сидоренконың пулемёты ярһып татылдай башланы. Аҡланда сыуалыш китте.* «Ағиҙел», 1969, № 8.

**2.** Хакимлыҡҡа ризаһыҙлыҡ белдергән күмәк актив хәрәкәт; бола. *Эстонияла крәҫтиәндәр сыуалышы башлангас, урындағы властар тоткондарҙы [Салауат менән Юлайҙы] Себергә ебәрергә уйлай, ләкин сенаттың генерал-прокуроры быны тыя.* Р. Солтангәрәев.

**СЫУАЛЫШЫУ** *к.* **1.** *урт. кар.* **сыуалыу** 2—4.

**2.** Ығы-зығы, сыр-сыу килеү; боларыу. *Байтаҡ сыуалышкас, ҡыҙҙар ултырышып бөттө.* М. Кәрим.

**3.** Ризаһыҙлыҡ белдереп ҡүтәрелеп сығыу, хәрәкәткә килеү. *Яйыҡ буйында ҡазаҡтар сыуалыша башланы.* Салауат Юлаев.

**СЫУАШ** *и.* Сыуаш ССР-ының төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (төрки телдәренең береһендә һөйләшә). *Сыуаш халҡы. Сыуаш ҡатыны. Сыуаш теле.*

**СЫУАШСА** *р.* **1.** Сыуаш телендә. *Сыуашса һөйләшеү.* ■ *Көтөүселәр сыуашса ҡыҫҡырып-ҡыҫҡырып йырлайҙар.* Ш. Шәһәр.

**2.** Сыуаш халҡына хас рәүештә. *Сыуашса кейеү.*

**СЫУЛАУ** *к.* **1.** Сыр-сыу ҡыҫҡырыу, сыр-сыу килеү. *Урамда бала-саға сыулай.*

**2.** Шау-шыуға күмелеү, гөрләү. *Ырымбурға яҡынлашкан һайын, юлсылар менән айырата сыулап, мыжғып торған юл уны [Емеште] тамам ғәжәпкә ҡалдырҙы.* З. Биишева.

**СЫУЛАШЫУ** *к.* Сыр-сыу ҡыҫҡырышыу. *Сыулашып йөрөү.* ■ *Элек, йәй көндәре улар [аҡсарлаҡтар] ошо ҡырсын таштары араһына һалған йоморткаларын һаҡлап .. сыулаша торғайны.* З. Биишева. *Һуҙып-һуҙып йырлап ебәрәләр күмәкләшеп, бергә сыулашып.* Т. Йәнәби.

**СЫУСЫТЫУ** *к.* Ҡапыл ҡурҡытып һиҫкәндереү; тертләтеү. *Йоҡлап ятҡан кешене сыусытып уятыу. Ҡоштарҙы сыусытып осороу.*

**СЫУСЫУ** *к.* **1.** Ҡапыл ҡурҡыу, һиҫкәнеү; тертләү. *Сыусып уяныу.* ■ *Ҡарасәс асыу менән әйткән был һүҙҙән сыусып китте.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Ҡапыл өркөү, бер яҡҡа тайшаныу. *Ат өҫтөндәге кеше ҡолап төштө. Бер аяғы өҙәнгенән ысҡынмағанға, уның кәүҙәһе, сыусып сабып барған аттың аяҡ аҫтында һөйрәлә бирел, ятып ҡалды.* И. Көҫәпҡол.

**3.** Ҡапыл ҡубыу, тынғыһыҙланыу. *Сурағол һайтылдап, һуҙа-һуҙа бер-ике ҡыҫҡырыуға, ауыл эттәре бөтәһе лә сыусып, бер-нисә минут ләңкелдәнеләр ҙә баҫылдылар.* Т. Хәйбуллин.

**СЫУЫЛДАУ** *к.* **1.** Әсенеп ҡыҫҡырыу. *Сыуылдап илау.*

**2.** *кар.* **сыулау** 1. *Сыуылдап уйнау.* ■ *Йәй буйы ҡош-ҡорт тауыштары сыуылдап торған тирәктәр .. хәҙер инде тынып ҡалған.* Һ. Дәүләтшина.

**СЫУЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **сыуылдау.** *Сыуылдашып уйнау.*

**СЫУЫН** *и.* Мал ҡарынындағы бала ята торған төргәк; сыу. *Сыуын һалыу.* ■ *Күҙ-ҡолаҡ булып тормағанда, йәш быҙауҙың туңып үлеүе йә һыйырҙың үҙ сыуынын ашауы бар.* Ж. Кейекбаев.

**СЫУЫУ** *к.* Һыҙылып шиңеү, кәмеү (эстәге майға ҡарата). *Һарыҡтың эс майы сыуған.*

**СЫЯҠ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Төҫ, ҡиәфәт.

**СЫЯНӘТ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит. кар.* **һаҡ** [2]. *Ярар ине үҙебеҙҙе ҡараһаҡ беҙ, гилемдең емештәрен ала алһаҡ беҙ, гилемде сыянәткә аләт ҡылып, күберәк тәфсир, хәдиҫ ҡараһаҡ беҙ.* Аҡмулла.

**СӘБА** *и.*, **сәба еле** *кар.* **саба** [2].

**СӘБАТ** *и. иҫк. кит.* Ныҡлыҡ, ныҡ тороусанлыҡ. *Һис туктауһыҙ зыр әйләнгән донъя бер шар, сәбат юк был донъяла эсем бошор.* М. Ғафури.

**СӘБАТЛЫ** *с. иҫк. кит.* Ныҡ, ныҡ тороусан. *Сәбатлы кеше. Сәбатлы булыу.*

**СӘБЕК** *с. диал.* Сибек. *Сәбек кеше. Сәбеккә әйләнеү.*

**СӘБЕРСЕНЕҮ** *к. диал. кар.* **сәбәләнеү** 1.

**СӘБЕРСЕҮ** *с.* Тик тормаҫ; теремек. *[Кинйә] бәләкәстән үк сәберсеү бала ине.* Ғ. Ибраһимов.

**СӘБЕРТЕҮ** *к. һөйл.* Сабыртыу. *Ирен сәбертте.*

**СӘБЕРТКЕ** *и. кар.* **сабыртҡы.** *Иренено сәбертке сыккан.*

**СӘБИЛ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Юл. *Һәр бер йән сәйран ҡылыр сәбилендә.* Аҡмулла.

**СӘБӘЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Аяҡ, ҡулды тәртипһеҙ рәүештә болғауға ҡарата әйтелә. *Ул [карт] ҡулдарын сәбәләндереп, Сәмиғулла ағына һелтәне.* М. Кәрим.

**СӘБӘЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Тәртипһеҙ рәүештә аяҡ, ҡулды болғау; тыбырсыныу, тулау. *Егеттәр Марфаны сарылдатып күтәреп алды. Ҡыҙ сәбәләнә.* А. Таһиров. *Ҡорт сакканға түҙә алмаған айыу сәбәләнә-сәбәләнә урманға инеп бара.* Р. Ҡотошов.

**2.** *күсм.* Тыныcһыҙланып, ары-бире һуғылыу, бәргәләнеү. *Басыров перронда сәбәләнеп йөрөгән кешеләр төркөмөн йыргылап үт[те].* Ә. Бикчәнтәев. *Аҙ ғына киҫкен мәл килһә, ҡайһы бер иптәштәр ҡаушап, аптырап ҡала, сәбәләнә, көйәләнә, ни эшләргә белмәй башлай.* С. Әлибаев.

**СӘБӘП** [*гәр.*] *и.* **1.** Нимәгәлер нигеҙ булған шарт йәки уны килтереп сығарған хәл, күренеш һ. б. *Мөһим сәбәп. Төп сәбәп. Ауырыуҙың сәбәбе. Үпкәләүҙең сәбәбе. Уңышһыҙлыҡтың сәбәбе.* ■ *[Сәгиҙә:] Атламай шул. Өсөнсө йәше менән бара, атларға уйламай ҙа. Сәбәбе нимәләлер, бер ҙә белә алмайбыҙ.* М. Тажи. *Тәбиғәттәге лә, йәмғиәттәге лә бөтә күренештәр .. тик сәбәп арҡаһында ғына була. Сәбәпһеҙ бер нәмә лә юк.* И. Насыри. / Ниндәйҙер эште, ҡылыкты аҡлауға нигеҙ булған шарт; һылтау. *Хушлашыуҙы оҙайтырға төрлө-төрлө сәбәп бар.* М. Кәримов. *Ике ағаһы сәбәбен табып, Заятүләкте ситкәрәк алып китә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** Ниндәйҙер эш-хәлдә башлап ебәргән, шуның нигеҙен тәшкил иткән нәмә йәки кеше; сәбәпсе. *Был ваҡиға [нәпмандар менән көрәш] беҙҙең араны тағы ла яҡынайтыуға сәбәп булды.* С. Агиш. *Беҙ, башкорттар, ерһеҙ ҡалдыҡ бөгөн ятып, быға сәбәп бабаларым булдымы икән?* (Бәйеттән).

□ **Сәбәп итеү** (*йәки* **ҡылыу**) хәстәр-сара күреү.

♦ **Сәбәптән** *бәйл. мәғ.* нимәләр арҡаһында, арҡала. *Халыҡ ул яуҙың ҡайҙан, ни сәбәптән сыкканын яҡшы белә.* Ғ. Амантай. *Оҙон яҙған, тиеп, бәлки, ғәйеп итер, шул сәбәптән хәтем-кәләм ҡылам инде* (Бәйеттән).

● *Үлгәндән һуң илағанса, үлмәҫ борон сәбәп ҡыл.* Әйтем.

**СӘБӘПЛЕ** *с.* Билдәле бер сәбәп арҡаһында. *Үткән кыш карҙың калын булыуы сәбәпле, йылҡы тибендән үҙенең һөлдәһен генә алып сыкты.* Ғ. Дәүләтшин. *Блиндаждың эсе һыу. .. Шул сәбәпле сүкәйеп кенә ултырабыҙ.* Д. Юлтый.

**СӘБӘПСЕ** *и.* Ниндәйҙер эш-хәлдә башлап ебәргән, башланыуға сәбәп булған нәмә йәки кеше; сәбәп. *Рәшиҙә Сәгиҙәне мәктәптә башбаштаҡлыҡ тыуҙырыуҙа беренсе сәбәпсе итеп ғәйепләргә маташ[ты].* М. Тажи. *Еңгәһе ошаҡ-фәлән менән Гөльямалдың теңкәһенә тейеп бөтә торғайны. Уны ҡарт кейәүгә көсләп биреүҙә-рене лә ошо еңгәһе сәбәпсе булды.* Б. Ишемғол.

● *Сығаһы малға әйәһе сәбәпсе.* Мәҡәл.

**СӘБӘПҺЕҘ** *с.* Бер ниндәй нигеҙе, сәбәбе булмаған, ниндәйҙер сәбәпкә бәйләнмәгән. *Сәбәпһеҙ шатлыҡ.* // *Сәбәпһеҙ илау. Һис бер сәбәпһеҙ ҡыҙҙарға һүҙ куштым: — Туғаштар, һеҙгә һалҡын түгелме? — тигән булдым.* Д. Юлтый. *Шик сәбәпһеҙ булмай.* Б. Бикбай.

**СӘГЕР** *с.* Йәшкелт зәңгәр (күҙгә ҡарата). *Йөнтәҫ каштары араһынан һыу кеүек сағыу сәгер күҙҙәр миңә төбәлде.* Ә. Вахитов.

♦ **Сәгер балыҡ** *кар.* **балыҡ** 1.

**СӘГЕРӘЙЕҮ** *к. диал.* Секрәйеү. *Сәгерәйеп ҡарау.*

**СӘГӘЙ** *с. диал.* Етеҙ, йылдам (атҡа ҡарата).

**СӘГӘЙ-СӨГӘЙ** *с. диал.* Ыбыр-сыбыр. *Сәгәй-сөгәй кешеләр.*

**СӘҒАДӘТ** *и. кар.* **сәғәҙәт.** *Сәғадәт табыу.*

**СӘҒИ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Тырышлыҡ.

**2.** Хәстәрлек. *Сәғием бушҡа китте.*

□ **Сәғи итеү** 1) тырышыу. *Әсмәне тәрбиә итмәктә ата вә әсәһе .. сәғи иткәндәре кеүек, бәхет вә сәғәҙәте хаҡында аллаһы тәғәлә хәҙрәтенә .. ялыныр ҙар ине.* Р. Фәхретдинов; 2) хәстәрлек күреү, хәстәрләү.

**СӘҒӘҘӘТ** [*гәр.*] *и. кит.* **1.** Бәхет, рәхәт тормош. *Сәғәҙәткә ирешеү.* ■ *Ҡайҙа китте икән ғаиләләрем менән рәхәт вә сәғәҙәттә торған көндәр.* Н. Ҡәрип. *Эҙләйем ғилем, йөрөһәм дә ерҙә генә, .. милләттең дә сәғәҙәте миндә генә.* Я. Юмаев.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ исеме.

**СӘҒӘҘӘТЛЕ** *с. кит.* Бәхетле, рәхәт. *Сәғәҙәтле тормош.* ■ *Ғәжәп эштәр үтеп тора һыялға, сәғәҙәтле ҡанун бар төҫлө алда.* М. Ғафури.

**СӘҒӘТ** [1] [*гәр.*] *и.* **1.** Тәүлектең егерме дүрттән бер өлөшөнә (алтмыш минутҡа) тигеҙ булған ваҡыт берәмеге. *Сәғәт ярым ваҡыт. Һигеҙ сәғәт эшләү. Ярты сәғәт ял итеү.* ■ *Сәғәттәр ҙә оҙон тойолдолар, һағынһындар әйҙә, тигәндәй.* М. Хәй. *Сәғәтенә алтмыш минут — минут һайын һағынам* (Халыҡ йырынан).

**2.** Тәүлектәге ваҡыт берәмегенең төн йәки көн үҙәгенән башлап иҫәпләнгән һаны. *Иртәнге сәғәт биш. Сәғәт 8-ҙә эш башлана. Сәғәт нисә? Сәғәт бер.* ■ *Мин барып еткәндә, сәғәт етене һуғырға күп калмаған ине.* Т. Йәнәби.— *Һеҙ, иптәш Янһаров, сәғәт өҫтә минең янға инеп сығығыҙ.* Б. Бикбай. / Ниндәйҙер эш-хәл башҡарылған йәки нимәләр барлыҡҡа килгән, булған ваҡыт, мәл. *Минең табыла шатлыҡ сәғәттәрем илгә белем сәскән көнөмдә.* Ғ. Амантай. *Шул сәғәт кемдер бераү килде.* Ш. Бабич. / Ниндәйҙер эш-шөғөлгә билдәләнгән ваҡыт. *Йоҡлар сәғәт. Уҡыу сәғәте. Эш сәғәте. Ял сәғәте.* ■ *Сәғәт тула. .. Эштәр туктала. Йәш ҡулдарға ҡәләм алына.* Ғ. Хәйри.

**3.** Бер дәрескә билдәләнгән ваҡыт араһы. *Тәнзилә лекцияның һуңғы сәғәтен тыңламаны.* Р. Низамов. *Ниндәй предметтар ауыр, уларға ниндәйерәк сәғәттәр кәрәк — [Салих] бөтәһен дә ныҡлап өйрәнде.* С. Агиш. / Бер фән өсөн билдәләнгән дәрес берәмеге. *Быны балаларға аңлатыр өсөн өҫтәмә сәғәт кәрәк булыр ине.*

М. Тажи. *Мөхлисә .. бер сәғәт дәресендә күңелендәге барыһын бирә.* Ш. Бабич.

♦ **Комендант сәғәте** киҫкен хәл иғлан ителгән саҡта, рөхсәтһеҙ урамға сығыу тыйылған билдәле ваҡыт араһы. *Комендант сәғәте индереү.* ■ *Мәскәүгә килһәм, .. комендант сәғәте алынмаған әле, шулай ҙа баш ҡала тыныс тормошҡа ныҡлап күскән ине.* Т. Кусимов. **Сәғәте менән** бик тиҙ арала. *Сәғәте менән килеп етеү.*

**СӘҒӘТ** [2] [*ғәр.*] *и.* Тәүлек эсендәге ваҡыт берәмеген иҫәпләй торған прибор. *Кәкүкле сәғәт. Ҡул сәғәте. Түш сәғәте. Сәғәт оҫтаһы.* ■ *Гөлсөм сәғәтенә ҡараны: иртәнге биш ине.* Я. Вәлиев. *Өй эсен ауыр тынлыҡ баҫты. Теле тутығып бөткән стена сәғәте иренеп кенә йөрөй.* Ә. Зәйнуллин. **Ҡом сәғәте** билдәле ваҡыт эсендә ҡойолоп бөтөүгә самалап, эсенә ҡом һалынған прибор. **Ҡояш сәғәте** ҡояштан төшкән күләткәгә ҡарап ваҡытты билдәләй торған прибор. **Сәғәт гере** ҡалаҡлы сәғәтте ауырлығы менән тартып йөрөтә торған гер. **Сәғәт ҡалағы** стена сәғәтенең бәүелеп торған өлөшө. **Сәғәт теле** 1) сәғәттең цифрблатында секунд, минут һәм сәғәт һанын күрһәтеп торған уҡ; стрелка; 2) *кар.* **сәғәт ҡалағы.** *Сәғәт теле һуға, туҡтай белмәй. Тигеҙ үлсәй ваҡыт үткәнен.* Я. Ҡолмой.

**СӘҒӘТЕНӘ** *р.* Бер сәғәт эсендә. *Сәғәтенә биш саҡырым юл үтеү.* ■ *Көнбайыштан көнсығышҡа осоп барып етәләр. Меңәр километр ерҙе сәғәтенә үтәләр.* Ф. Дәүләтшин.

**СӘҒӘТЛЕ** *с.* Сәғәт [1] (1 мәғ.) менән иҫәпләнә, билдәләнә торған. *Сәғәтле эш.*

**СӘҒӘТЛЕК** [1] *и.* Сәғәттең сәғәт һанын күрһәткән ҡыҫҡа теле; бәләкәй стрелка.

**СӘҒӘТЛЕК** [2] *с.* Күпмелер сәғәт [1] (1 мәғ.) һаны менән сикләнгән, күпмелер сәғәткә тиң. *Ике сәғәтлек юл. Ярты сәғәтлек эш.*

**СӘҒӘТЛӘП** *р.* Сәғәт һанына тап килтереп, сәғәт һаны менән сикләп. *Сәғәтләп эшләү. Сәғәтләп йоҡлау.* ■ *Көмөшләнә сикә сәстәр көн һәм сәғәтләп.* М. Тажи. *Тимербулат көнләп түгел, сәғәтләп үҫкән, ти* (Әкиәттән).

**СӘҒӘТСЕ** *и.* Сәғәт оҫтаһы.— *Ни йомош?.. Сәғәтсе кәрәкме әллә? — Эйе, кәкүкле сәғәтемде төҙәтергә алғайны.* Ғ. Ғүмәр.

**СӘД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Кәртә. *Юлдарымда сәд, ауҙар ҡоролған. Күренмәй иҡбал, ҡап-ҡара урман.* С. Ҡудаш.

**2.** *күсм.* Тотҡарлыҡ, ҡаршылыҡ. *Сәд булмаҫ саф һыуҙы дуңғыҙ ятып быуған менән.* Б. Мирзанов.

**СӘДӘД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ниәт, маҡсат.

**СӘДӘФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡабырсаҡ перламутры. *Уның өсөн ителер өмөт хәләфтән, уның өсөн сәселер дәрҙәр сәдәфтән.* М. Өмөтбаев.

**СӘЖҒЫ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Рифмалаштырылған сәсмә әҫәр. *Ҡөрьәндең күп өлөшө сәжғы рәүешендә яҙылған.* «Ағиҙел», 1968, № 10.

**СӘЖДӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Теҙ сүгеп, баш эйгән хәл. *Сәждәгә йығылыу. Сәждәнән ҡалҡыу.* ■ *Сажидә бер кәрамәт саз шикелле, сазына миллион сәждә аҙ шикелле.* Ш. Бабич. *Май көнө «эш байрамы» булғас, сәждәм уға минең.* И. Насыри. / *дини* Намаҙ ваҡытында йөҙ түбән табынған хәл. *Староста .. намаҙ уҡып ултырған Мифтахты килеп ҡарай. Унын һайын Мифтах тырышып сәждәгә китә.* К. Мәргән.

□ **Сәждә ҡылыу** (*йәки* **итеү**) 1) теҙ сүгеп, баш эйеү. *Тулған ай ҙа бер ғаҙамат алдында сәждә иткән кеүек, ергә ҡарап, урынында ҡуҙғалмай тора.* М. Ғафури. *Ярлы илде иҙгән алтындарға сәждә итмәм, һис тә баш эймәм.* Д. Юлтый; 2) намаҙ ваҡытында йөҙ түбән китеп табыныу. *[Нуретдин] намаҙлыҡта сәждә ҡылып тора хоҙаға.* Ғ. Әмири.

**СӘЖӘМӘ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Бер ынғай аҡҡан, үҙ ағышы менән барған. *Ул һинең ҡанлы тарихыңдың сәжәмә рәүеше ул.* Б. Мирзанов.

**СӘЙ** [*ҡыт.*] *и.* **1.** (*йәки* **сәй ҡыуағы**) Япрағы хуш еҫле эсемлек әҙерләү өсөн ҡулланылған, көньяҡта үҫкән мәңге йәшел ҡыуаҡ йәки ағас. *Сәй япрағы. Сәй үҫтереү.* ■ *Беренсе сәй ҡыуағы Грузияға 1848 йылда килтерелгән.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 12 август.

**2.** Шул ҡыуаҡтың ҡайнар һыуҙа бешереп эсер өсөн махсус ысул менән эшкәртелгән япрағы. *Грузин сәйе. Ҡытай сәйе. Һинд сәйе. Сәй һауыты. Сәй бешереү.* ■ *Өйгә сәйлүн сәйенең хуш еҫе тула.* Ш. Янбаев. *[Ҡарт:] Һай, ошо бөртөклө яҡшы сәйҙең еҫе үк йоҡоно асып ебәрә.* Ҡ. Даян. **Аҡ ҡойроҡ сәй** юғары сифатлы һинд сәйенең элекке атамаһы. *[Ҡарттар] самауырҙы өҫтәтеп-өҫтәтеп, бер сирек маҡтаулы аҡ ҡойроҡ сәйҙе бөтә яҙғансы эсеп ҡаралдылар.* Һ. Дәүләтшина. **Йәшел** (*йәки* **күк**) **сәй** бешергәндә йәшкелт булып сыҡҡан, әскелтем тәмле сәй төрө. *Ике үзбәк икеһе ике сәйгүндән ашыҡмай ғына күк сәй эсә.* А. Таһиров. **Кирбес сәй** *диал. кар.* **таҡта сәй. Таҡта сәй** бәләкәй генә яҫы кирбес рәүешендәге сәй (ғәҙәттә сәй онтағынан ойоштороп яһала). / Ҡайнар һыуҙа бешереп эсер өсөн киптереп әҙерләгән төрлө үлән. *Мәтрүшкә сәйе. Япраҡ сәй.* ■ *Был килен үлән сәй, эсе ҡатыҡ менән генә көн күргән, ти* (Әкиәттән).

**3.** Шул ҡыуаҡтың, ағастың япрағын йәки үләнде ҡайнар һыуҙа бешереп әҙерләгән хуш еҫле эсемлек. *Ҡаты сәй. Шыйыҡ сәй. Сәй ҡайнатыу. Сәй эсеү.* ■ *«Хоҙай һуҡһын, рәхәтләнеп һөтлө сәй эсербеҙ тигәйнем, ризыҡты өҙҙө бит!» — тип әсәйем бесәйҙе әләктереп алды.* Ғ. Минһажев. *Гөлнәзирә еңгә сәйҙе бик яратып, шәкәрҙе керт-керт итеп тешләп ҡабып эсте.* Ғ. Әмири. / Шул эсемлекте әҙерләр өсөн ҡайнатырға ҡуйылған һыу. *Сәй ҡуйыу.* ■ *Таганға аҫылған баҡырсалағы сәй ҡайнап сыҡҡансы, Шафиҡ этен һыйланы.* Я. Хамматов.

**4.** Нигеҙҙә шул эсемлектән торған ашау-эсеү табыны. *Иртәнге сәй. Киске сәй. Сәй аштары. Сәйгә алыу (йәки саҡырыу). Сәйгә ултырыу. Сәй ултыртыу. Сәй әҙерләү.* ■ *Сәйҙе урталағанда кемдер ишек туҡылдатты.* Т. Хәйбуллин. *[Муйылбикә:] Юҡ, юҡ, ҡуҙғалмағыҙ. Самауыр яңыртам. Баягыһы өмә сәйе ине, быныһы аулаҡ өй сәйе булыр.* Һ. Дәүләтшина. **Кәкүк сәйе** йәш ҡыҙ-ҡыртҡындың яҙ көнө күңел асыу өсөн ҡырға сығып эскән сәй табыны.

♦ **Болон сәйе** түшәлеп, быуын-быуынындан тамырланып үҫкән нәҙек һабаҡлы, түңәрәк япраҡлы, эре һары сәскәле уйһыу үләне. **Кейәү сәйе**

кейәүләп килгән егетте ҡыҙға ҡушҡандан һуң, йөрөтөп ҡунаҡ итә торған еңгәләр һыйы (туйға тиклем була). **Ҡытай сәйе** һары сәскәле, ваҡ япраҡлы дарыу үләне. **Монгол сәйе** ҡыҙғылт сәскәле, ҡалын итләс япраҡлы үлән (япрағы менән тамырында тире иләү өсөн кәрәкле матдә була, япрағын сәй итеп тә эсәләр). **Сәй уты** *ҡар.* **ут** [2].

● *Ҡоро сәй — корһаҡ ҡамсыһы.* Әйтем.

**СӘЙГҮН** *и.* Сәй бешерә торған тоткалы, моронло һауыт. *Көмөш сәйгүн. Сынаяҡ сәйгүн.* ■ *[Эткол] боркорап торған самауыр, сылтырап торған сәйгүндән тәмле ҡытай сәйен ҡаты ғына итеп яһатып, оҙаҡлап-оҙаҡлап сәй эсте.* Ғ. Дәүләтшин. *Нәгимә сәй кып-ҡыҙыл булып сыҡҡансы сәйгүнде самауыр башында тота.* С. Агиш.

**СӘЙЕН** *бәйл. диал.* Тиклем. *Көҙгә сәйен. Төнгә сәйен.*

**СӘЙЕР** [1] [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Хәрәкәт.

**2.** Күҙәтеп, тамаша ҡылып торған хәл.

□ **Сәйер ҡылыу** (*йәки* **итеү**) 1) ил гиҙеү. *Теләйем шунда шул ерҙәргә китергә, барып рәхәттәр сигергә, сәйер итергә.* М. Сабит; 2) күҙәтеү, тамаша ҡылыу. *Тәбиғәт күренештәрен сәйер итеү.*

**СӘЙЕР** [2] *с.* Ғәҙәттәгелә булмаған, ғәҙәттәгенән айырмалы, ят; ғәжәп, ҡыҙыҡ. *Сәйер исем. Сәйер кеше. Сәйер тынлыҡ. Сәйер уй. // Сәйер көлөү. Сәйер күренеү.* ■ *Йә, балалар, бергә-бергә сығайыҡ оҙон юлға, сәйер сәйәхәт ҡылайыҡ илле беренсе йылға.* Р. Ниғмәти. *Әле генә сыҡҡан ҡаранғы, еүеш йырындан һуң, күктә янып торған ҡояшты күреү сәйер ҙә, ҡыуаныслы ла ине.* Ш. Янбаев. *Ҡыҙҙар көндәгенән иртәрәк таралды. Әллә ниндәйерәк улар бөгөн, сәйерҙәр.* Я. Вәлиев.

**СӘЙЕР** [3] *и. диал. ҡар.* **сайыр.** *Сәйер ағыҙыу.*

**СӘЙЕРЛЕК** [1] *и.* Сәйер [2] эш, сәйер ҡыланыш. *Бер ни төшөнмәгән Таштимер, эре генә итеп «ҡыҙыҡ» тигән булды ла, карттың сәйерлегенә көлөмһөрәп, кире сығып китте.* Р. Солтангәрәев.

**СӘЙЕРЛЕК** [2] *и. иҫк. кит.* Ял итеп йөрөй торған урын. *Улар сәйерлеккә сығып йөрөгәндә, батшаның ҡатыны: «Бик ауырландым, рөхсәт итһәң, ҡайтып инем»,— тигән* (Әкиәттән).

**СӘЙЕР-СӘЙӘХӘТ** *и. йыйн.* Ил, донъя гиҙеү эше. *Сәйер-сәйәхәттә йөрөү.*

**СӘЙЕРҺЕНДЕРЕҮ** *к.* Ғәжәпләндереү, аптыратыу. *Әле ныҡлап эшләнеп тә бөтмәгән был таш һынды карттың таныуы мине тағы сәйерһендерҙе.* Ә. Вахитов.

**СӘЙЕРҺЕНЕҮ** *к.* Нимәгәлер ғәжәпләнеп, бер аҙ аптырап ҡалыу. *Зәлифә лә карттың был ҡылығынан сейерһенде булһа кәрәк, яран гөлөн балконға ҡуймай башланы.* З. Ураҡсин. *Сәйерһенеп юкка ҡарап ҡалам йәштәр түгеп болот елгәндә.* М. Ғәли.

**СӘЙЕТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Батша, хаким.

**2.** Мөхәммәт пәйғәмбәр нәҫеленән булған кеше.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**СӘЙЕФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡылыс. *Мостафа Сәйфелмөлөк, сәйефең — белек, юк һис хафа.* Ш. Бабич.

**СӘЙЛЕК** *и.* Ваҡ-төйәк хеҙмәт күрһәткән өсөн бирелгән аҡса. *Сәйлек биреү.* ■ *Плотниктарға яңы өйҙө тиҙерәк эшләп бөтөрөү өсөн [Мырҙаш] бик мул ғына сәйлек төрттө.* Д. Юлтый. *Беренсе класс залда .., эш ауыр булһа ла, сәйлек тигән төшөм тамғылай.* Ғ. Ғүмәр.

**СӘЙЛӘН** *и.* **1.** Бик ваҡ быяла мәрйен. *Аҡ сәйлән. Сәйлән менән сигеү.* ■ *Бер башына сәйлән кейҙерелгән оҙон энәләр менән эш иткәндә, уның [Мәүлиханың] ҡулдарына күҙ эйәрмәй.* М. Кәрим. **Көпшә сәйлән** нәҙек кенә ваҡ көпшә рәүешендәге сәйлән. / *һөйл.* Шул мәрйендән яһалған мунсаҡ. *Сәйлән тағыу.*

**2.** *күсм.* Нимәнеңдер теҙеме. *Марат Кәримовтың .. «Агиҙелгә» шиғыры фәҡәт сағыштырыуҙар сәйләненә ҡоролған.* Ғ. Хөсәйенов. *Кешелек өсөн утлы сәйлән итеп, теҙгем килә серҙәр бөртөгөн.* М. Ғәли.

**СӘЙЛӘНЛЕ** *с.* Сәйлән (1 мәғ.) менән сигелгән, биҙәлгән. *Ҡайыулы алъяпкыстар бәйләп, сәйләнле калпаҡтар кейеп сыҡҡан ҡатын-ҡыҙҙар төркөмө күренә.* К. Мәргән.

**СӘЙЛӘТЕҮ** *к.* Сәй эсереү. *Сәхипгәрәй .. Сабир мулланы саҡыртып алды. Был юлы ул Ғиҙелбанатты индереп, мулланы сәйләтеп торманы, тура лавкаһына алып китте.* И. Ғиззәтуллин.

**СӘЙЛӘТӘ** *р.* Сәй көйө, сәй менән. *[Әхмәҙулла:] Сәлимгәрәй бай, һин дә ул кешегә [Закирға] сәйләтә, ситсалата төртөрһөң әле.* А. Карнай.

**СӘЙЛӘҮ** *к.* Сәй эсеү.— *Алда ауыл алыҫ бит, сәйләп китегеҙ.* А. Таһиров. *[Ғиззәт:] Бар әле, эсәй, .. самауырыңды ҡуйып ебәр, сәйләп алырға кәрәк.* Х. Ибраһимов.

**СӘЙНҮК** [*рус.* чайник] *и.* **1.** Сәй өсөн һыу ҡайната торған оло сәйгүн; баҡырса. *Суйын сәйнүктең һемәгенән, күпереп, ҡайнар һыу таша башланы.* Ҡ. Даян.

**2.** *диал.* Сәйгүн.

**СӘЙНӘЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **сәйнәү** 1—3. *Сәйнәлгән аҙыҡ. Мең ҡабат сәйнәлгән әкиәт. Сәйнәлгән сюжет.*

**СӘЙНӘМ** *и.* Бер ҡабып сәйнәрлек аҙыҡ һ. б. *Бер сәйнәм икмәк. Бер сәйнәм һағыҙ.*

**СӘЙНӘМЛЕ** *с.* Сәйнәп ашарлыҡ (тығыҙ, төйөрөм нәмәгә ҡарата). *Сәйнәмле аҙыҡ.*

**СӘЙНӘНЕҮ** *к. һөйл.* Ризаһыҙлыҡ белдереп һөйләнеү. *Йәнтимер белмәй торһа ла ярар, йә сәйнәнә башлар.* С. Агиш.

**СӘЙНӘҮ** *к.* **1.** Ҡапҡан нәмәне теш менән ваҡлап иҙеү, өҙгөләү. *Сәйнәп йотоу. Ныҡ сәйнәү.* ■ *Ашағанда карттаһы һөйләшмәй, йоҡомһораған һымаҡ, күҙен йома биреп, оҙаҡ сәйнәй.* Ш. Янбаев. *Баҙыян менән кәнәферҙән сәйнәп кенә бөткәс тәм ҡала* (Халыҡ йырынан).

**2.** Теш менән ҡымтып алып, ҡыҫҡылау. *Ауыҙлыҡты сәйнәү. Мыйыҡ осон сәйнәү.* ■ *Солтанов өндәшмәй, аҫҡы иренен сәйнәп тик килә.* Б. Бикбай. / Теш менән иҙгеләп, йотмайынса ауыҙҙа тотоу (һағыҙға һ. б. ҡарата). *Ҡарағас һағыҙы бында ҡыҙ-ҡыркын араһында иң ҡиммәтле сәйнәү әйбере иҫәпләнә.* З. Биишева. *Төн кеүек ҡап-ҡара һыйыр юлдың уртаһына ятҡан да көйөшөн сәйнәй.* Ғ. Хәйри.

**3.** Нимәнелер өҙгөләргә теләгәндәй, тешләй-тешләй алыу. *Кеше сәйнәп ырғытырҙай уҫал эт.* ■ *Быға тиклем бер нәмәгә ҡыҫылмаған Ниғмәтулла ла, үҙ байлығын ҡулынан ысҡынды-*

*рған кеше һымаҡ, йоҙроҡ һыртын сәйнәне.* Я. Хамматов. **Боғазын сәйнәү** *шул уҡ* **алҡымын сәйнәү** *ҡар.* **алҡым.**

**4.** *күсм.* Өҙмәй ҙә ҡуймай бер нәмәне һөйләү, тылҡыу. *Юҡты сәйнәү.* ■ *Ул [Ялаев] бер уҡ мәғәнәһеҙ һүҙҙе сәйнәргә тотондо.* Ғ. Әхмәтшин. *[Сәрүәр:] Кеше-кара гына күрмәһә ярар ине. Атайыма ишетелһә, ғүмер буйы сәйнәр.* Х. Ибраһимов.

**5.** *күсм.* Ваҡ-төйәкте ғәйеп итеп, яманлап һөйләү. *Һаман шул Яшинский этлеге. .. Инде килеп, бына тигән кешене — Дәүриә апайҙы сәйнәргә керешкән.* З. Биишева. *Белгәне тик кеше сәйнәү, бушты бушҡа ауҙарыу.* А. Игебаев.

**6.** *диал. ҡар.* **тешләү** 1. *Серкәй сәйнәй.*

♦ **Ҡолаҡ итен сәйнәү** *шул уҡ* **ҡолаҡ итен ашау** (*ҡар.* **ҡолаҡ**). *Донъяның ҡыҙығы китте. Вакиға ханым минең ҡолаҡ итен сәйнәргә тотондо. Иртә-кисен аш урынына таш йоттора бит малай!* С. Кулибай. **Сәйнәп ҡаптырыу** кешегә уйланырға, үҙенә эшләргә урын ҡалдырмай тамам әҙер итеп, аңлатып биргәндә әйтелә. *Донъя күргән ирғә сәйнәп ҡаптырыу кәрәкмәй.* Һ. Дәүләтшина. **Сәйнәп ҡаптырғанды йота алмай** әҙер нәмәне файҙалана, ҡуллана белмәгән кешегә ҡарата әйтелә. **Тел сәйнәү** юк-бар һөйләү; ләстит һатыу. *[Нәғим:] Йә, тел сәйнәмә, сығар папиросыңды.* И. Насыри. **Урт сәйнәү** тышҡа сығармай, эстән көйөү, эстән асыуланыу. *Һине күрһәм, урттарымды сәйнәп, боролормон ситкә тиҙерәк.* Р. Бикбаев. **Яға сәйнәү** бер-бер эш йәки уҫаллыҡ ҡылырға бик тырышыу. *[Сурағол:] Яға сәйнәп .., ил ябырып ҡауға һалып мине йотмаҡ булһалар ҙа, барыбер эш ҡыра алманылар.* Т. Хәйбуллин.

**СӘЙНӘШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **сәйнәү** 1, 5. *Беҙ сәйнәшә торҙоҡ, улар беҙгә әйләнеп тә ҡарамай йөрөй бирҙе.* М. Кәрим. *Айыу менән алышып, бүре менән сәйнәшеп .. төйәгемде тапҡанмын.* «Аҡһаҡ ҡола».

**СӘЙРАН** [*ғәр.*] *и. кит.* **1.** Кешенең күңел асып, тамаша ҡылып йөрөүе, күңел асырға сығыуы. *Бер вакыт батша ҡырға сәйранға сығып китә, бисәһе өйҙә ҡала* (Әкиәттән). / Кемдеңдер ил буйлап сәйәхәте. *Мине туйҙырҙы был тормош, китәм бынан, китәм сәйран.* Д. Юлтый.

**2.** *с. мәғ.* Күңелле, рәхәт. *Бар ине арзан заман, сәйран заман, хайран заман.* Ш. Бабич. *Иҫкелектәр мәмләкәтте ирер вайран, ике ара сәй эсеүҙәр бигерәк сәйран.* М. Ғафури.

□ **Сәйран итеү** (*йәки* **ҡылыу**) 1) күңел асып, тамаша итеп йөрөү; күңел асыу. *Тәбриклләйҙәр байрам көнөн, итәйек бер сәйран, тиҙәр.* С. Ҡудаш; 2) көн күреү; йәшәү, йөрөү. *Һәр бер нәмә ҡыуана, ти, ерҙә сәйран иткәненә.* М. Илбаев.

● *Донъя — сәйран, кеше — ҡаруан.* Мәҡәл.

**СӘЙХАНА** [*фарс.*] *и.* Сәй эсеп, тамаҡ ялғап сыға торған бина. *Үзбәк сәйханаһы.* ■ *Баҙар көн булғанғамы, сәйханала халыҡ күп ине. Ғариф ҡарт саҡ буш урын тапты.* Д. Исламов. *Атаһы ун биш йәшлек Зөһрәне Урта Азияға алып барып, сәйхана тотоусы үзбәккә ҡалдырып китте.* Б. Дим.

**СӘЙХУР** [*фарс.*] *с.* Сәй яратҡан, сәйҙе күп эскән. *Сәйхур кеше.* ■ *Минең .. ҡәйнәм бер ҙә юҡҡа ғына сәйхур түгел икән, бер ҙә юҡҡа ғына бер ултырғанда бер самауыр сәйҙе эсеп бөтөрмәй икән.* Ғ. Ғүмәр.

**СӘЙ-ШӘКӘР** *и. йыйн.* Сәй менән шәкәр. *Сәй-шәкәр алыу.* ■ *Иртөбәковтың .. бер бау һуған, биш ҡаҙаҡ ит, сәй-шәкәр, кер һабыны алып сыҡҡас, эше лә бөттө.* Б. Бикбай.

**СӘЙӘР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Һәр ваҡыт хәрәкәттә булған, йөрөгән кешегә йәки нәмәгә ҡарата әйтелә. *Сәйәр еле.*

**2.** Күҙәтеп, тамаша ҡылып тороусы.

□ **Сәйәр итеү** нимәнелер күҙәтеү, тамаша ҡылыу. *[Фәхерлебанат — Йыһаншаға:] Беҙҙә һеҙҙең күүек икенсе ҡат күктәрҙе сәйәр иткән әҙәмдәр менән һөйләшерлек гилем дә юҡтыр.* З. Һаҙый.

**СӘЙӘРСЕ** *и. иҫк. кит.* Күҙәтеүсе, тамаша ҡылыусы; сәйәр. *[Тауҙар] байтаҡ ваҡыттар үҙ тирәләрендәге халыҡтарҙың хәят майҙанындағы ярыштарына сәйәрсе булып торғандарҙыр.* Ф. Вәлиев.

**СӘЙӘСИ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Сәйәсәткә мөнәсәбәтле; политик. *Сәйәси бүлек. Сәйәси етәкселек. Сәйәси хәл. Сәйәси эш.* ■ *Себер урмандарында .. кеше үлтереүселәр һәм аҫ карактары ғына түгел, бәлки батша хөкүмәтенә ҡаршы көрәшеүсе сәйәси гөнаһлы кешеләр ҙә йәшәгән.* М. Ғафури.

**СӘЙӘСӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Хөкүмәт, партия йәки бер төркөмдөң эске идара һәм халыҡ-ара өлкәһендәге эшмәкәрлеге; политика. *Иҡтисади сәйәсәт. Хәрби коммунизм сәйәсәте.* ■ *Өс ай эсендә Фатима ире Ғәббәстең ярҙамы менән наҙанлығын бөтөрҙө, сәйәсәттән дә шаҡтай белем алды.* Ш. Шаһәр. *Ямал ағай .. сәйәсәттән бик һай йөҙгәндә лә советсы ҡарт, кулакты яҡламай.* С. Ҡудаш.

**СӘЙӘСӘТСЕ** *и. иҫк.* Сәйәсәт менән шөғөлләнгән кеше; политик. *Милли сәйәсәтсе. Сәйәсәтселәр ойошмаһы.*

**СӘЙӘХӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Өндәү, саҡырыу тауышы.

♦ **Сәйәхә еле** мосолман диненсә, йәнәһе, пәйғәмбәрҙең өндәү, саҡырыу тауышын килтергән ҡибла еле.

**СӘЙӘХӘТ** [*ғәр.*] *и.* Ил, донъя гиҙеп йөрөү. *Алыҫ сәйәхәт.* ■ *Сәйәхәт ике аҙнаға һуҙылды.* М. Кәрим.

□ **Сәйәхәт итеү** (*йәки* **ҡылыу**) ил, донъя гиҙеү. *Ун биш көн инде беҙ тимер юлда сәйәхәт итәбеҙ.* Д. Юлтый. *Сәйер сәйәхәт ҡылайыҡ илле беренсе йылға.* Р. Ниғмәти.

**СӘЙӘХӘТНАМӘ** [*ғәр.* + *фарс.*] *и. кит.* Сәйәхәт көндәлеге, юл яҙмаһы. *Ғүмере буйы тыуған ҡалаһынан йүнләп ситкә лә сыҡмаған Жюль Верн ҡайһылай мажаралы сәйәхәтнамәләр тыуҙырған.* Ғ. Хөсәйенов.

**СӘЙӘХӘТСЕ** *и.* Ил, донъя гиҙгән кеше; илгиҙәр. *Сәйәхәтсе булыу.* ■ *18-се быуаттың атаҡлы сәйәхәтсеһе академик П. С. Палластың күрһәтеүенсә, Сыҡ һәм Шишмә йылғалары буйында йәшәгән башҡорттар ҙа нефтте дауаланыу өсөн ҡулланған.* Д. Бураҡаев.

**СӘЙӘҺЕНДӘ** [*фарс.*] *бәйл. иҫк. кит.* Арҡаһында. *Күмәк ғәскәр вә закон сәйәһендә уңыш тапты тажарҙар сауҙаһында.* М. Өмөтбаев.

*Аллаяр аға хәҙрәттең бер еләнен буш теккән икән дә, шуның сәйәһендә байыған, имеш.* З. Өммәти.

**СӘЙЯР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ил гиҙеүсе, сәйәхәтсе, илгиҙәр.

**СӘЙЯРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Планета. *Иҫке тормош, яңы тормош — былар ике сәйярә.* Х. Ғәбитов.

**СӘЙЯХ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Сәйәхәтсе, илгиҙәр. *Ғәбделрәхим үҙен .. ислам донъяһы менән якындан танышып өсөн сығарылған бер сәйях итеп ғарыҙ итә.* Ғ. Рафиҡи.

**СӘК** *окш.* Сынаяҡҡа, йоҡа ҡаты нәмәгә еңелсә һуҡҡанда сыҡҡан йомшаҡ нәҙек тауышты белдергән һүҙ. *Сәк итеп бәрелеү.*

**СӘКЕ** *и.* Атыу ҡоралының пистонға һуға торған өлөшө; сирткес. *Сәкене ултыртыу.* ■ *Сәләхетдин, тоҡкап, сәкене тартһа, мылтығы атылмай ҙа ҡуя.* Н. Мусин.

**СӘКЕЙ** *и.* Йомрандың күрәнһыу төҫтәге бәләкәй бер төрө.

**СӘКЕЛДӘТЕҮ** *к.* **1.** Сәк-сәк иттереү, сәк-сәк тигән тауыш сығарыу. *Мәһира асыуланып, сынаяҡтарҙы сәкелдәтеп, өҫтәлде йыя башланы.* Н. Ҡотдосов. *Ҡолас йәйгән өйәнке төбөндә сәкелдәтеп салғы сүкейҙәр.* С. Ҡудаш.

**2.** *күсм.* Атып үлтереү.— *Ҡаса башлаһа, урынында сәкелдәтегеҙ ҙә ҡуйығыҙ.* И. Насыри.

**СӘКЕЛДӘҮ** *к.* Сәк-сәк тигән тауыш сығарыу, уйнау (һуйырға ҡарата). *Һуйыр сәкелдәгәне ишетелә.*

**СӘКЕЛДӘШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **сәкелдеү.**

**СӘКЕН** [1] [*ғәр.*] *и.* Ғәрәп орфографияһында: хәреф өҫтөнә ҡуйылып, тартынҡынан һуң һуҙынҡы өн юҡлығын белдергән бәләкәй генә түңәрәк рәүешендәге диакритик билдә. *Сәкен ҡуйыу.*

**СӘКЕН** [2] *и.,* **сәкен балта 1.** Ныҡ ағастан яһалған оҙон һаплы, нәҙек билле һуғыш балтаһы.

**2.** Башлы шәкәрҙе вата торған бәләкәй генә балта рәүешендәге ҡорал.

**СӘКЕН-СӨКӨН** *и. йыйн.* Юҡ-бар ваҡ нәмә; ваҡ-төйәк. *[Мәрхәбә:] Анау бер ваҡыт уйнап ҡына һөйләгәнемде сәкен-сөкөнөн дә ҡалдырмай .. кеше ышанырлыҡ итеп яҙып сыҡтығыҙ бит.* М. Тажи.

**СӘКЕТЕҮ** *к.* **1.** Атыу ҡоралының сәкеһен ысҡындырыу. *Әсәйем .. эткә тоҫҡаны. Бер сәкәтә — атылмай. Ике сәкетә юҡ.* Ә. Атнабаев. / Атып кем йәки нимәгәлер тейҙереү. *Мылтыҡты сәкетеү. [Мәхмүт:] Аҡтарҙы мылтыҡ менән сәкетәм генә.* С. Агиш.

**2.** *диал. ҡар.* **сәкәштереү 1.**

**СӘКЕҮ** *к. һөйл.* **1.** Металл нәмәләрҙе сүкеп семәрләү, сүкеп һыр төшөрөү. *Беләҙек сәкеү. Көмөш һауытты сәкеү.*

**2.** Атып кем йәки нимәгәлер тейҙереү, юҡ итеү. *Соҡорға төшөп, юл менән ҡайтһаң, тау башындағы австриецтар сәкеп кенә торалар.* А. Таһиров.

**СӘКЕШ** *с. һөйл.* Сәкәйеп торған, сәкәйгән. *Сәкеш танау.*

**СӘКМӘН** *и.* **1.** Йөн туҡыманан итәк һәм яғаһының ситен, ең остарын сигеп йәки ҡыҙыл буҫтау, уҡа менән әҙепләп теккән киң билле тышҡы кейем. *Аҡ сәкмән. Буҫтау сәкмән. Мәллә сәкмән. Соға сәкмән. Тула сәкмән. Уҡалы сәкмән. Сәкмән кейеү.* ■ *Итәк-яғаһы һәм ең остары сигелгән сәкмәнде хәҙер тау башҡорттарында ғына күрергә мөмкин.* Ә. Вәли. *Ҡармазинҡай яға, ай күк сәкмән килбәтһеҙ ҙә иргә килешмәй* (Халыҡ йырынан).

**2.** *иҫк.* Башҡорттарҙың элекке ғәскәри кейеме. *Әрмеләрҙә беҙ йоҡлайбыҙ тар сәкмәнде ябынып* (Халыҡ йырынан).

**СӘКРАН** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Иҫерек. *Бер заман әһле сәғәҙәт мәжлесендә булманым, хәмре ғәфләттән башым сәкран икәндер — белмәнем.* Һ. Салихов.

**СӘКСӘК** *и.* **1.** Йомортҡаға баҫҡан аҡ бойҙай ҡамырынан ваҡ ҡына итеп ҡырҡып, һары майға ҡайнатып бешергән ашамлыҡ. *Баллы сәксәк. Сәксәк бешереү.* ■ *[Шәрәфи — Зөлхәжәргә:] Әбейеңдең ҡыҙҙары ебәргән бик тәмле күстәнәс сәксәге лә бар. Сәй эсеп алырһығыҙ.* В. Исхаҡов. *[Иван:] Сәй янына бауырһаҡ, ҡош теле, сәксәк ҡуйырбыҙ.* С. Агиш. **Кейәү сәксәге** туйға күстәнәс итеп баш ҡоҙағый алып килгән сәксәк (уны асҡанда, кейәүҙең еҙнәһе бер баш мал йәки башҡа бүләк әйтә).

**2.** *диал.* Бауырһаҡ.

**СӘК-СӘК** *окш.* Ҡабат-ҡабат сәк иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сәк-сәк итеү. Сәк-сәк килеү.*

**СӘКҮНӘЙ** *с. диал.* Аумаҡай.

**СӘКҮШКӘ** [*рус.* чекушка] *и. диал.* Сикәсөй. *Арба сәкүшкәһе.*

**СӘКӘЙ** *с. диал.* Сәкеш. *Сәкәй танау.*

**СӘКӘЙЕҮ** *к.* Осо, баш яғы өҫкә кәкрәйеү; кәксәйеү. *Итектең башы сәкәйгән.* ■ *Сәкәйең керәп торған танау уны [Сабираны] әллә ни матур күрһәтмәй.* И. Ғиззәтуллин.

**СӘКӘЙЕШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **сәкәйеү.**

**СӘКӘЙТЕҮ** *к.* Ос яғын, башын өҫкә күтәреү, кәкрәйтеү; кәксәйтеү. *Ҡыҙрас ике ҡулын кеҫәһенә тығып, танауын сәкәйтеп, .. Юлдаш ултырған баҫҡыстың аҫтынан ғына үтеп китте.* З. Биишева. *Йылан башын сәкәйтеп, Уралға ҡарап ялбарған.* «Урал батыр».

**СӘКӘК** *и. ҡар.* **соңҡа** [1].

**СӘКӘЛСӘЙ** *и. диал.* Йәкәл. *Сәкәлсәйгә һуғыу.*

**СӘКӘЛӘЙ** *с. диал.* Һуғыш суҡмары (*ҡар.* **суҡмар**).

**СӘКӘЛӘШЕҮ** *к.* **1.** Сәкән уйынында туп өсөн булашыу.

**2.** Үҙ-ара еңелсә һуғышыу; бәргеләшеү. *Мәхмүт Кинйәбайҙың бала саҡтан бергә уйнап-көләп, сәкәләшеп, һуғышып үҫкән бер туған ағаһы.* Б. Хәсән. *Тоҡтомалға көрмәкләшеп, айкаша Алтынғужа, көрмәкләшеү, сәкәләшеү, йәнәһе, ҡыҙыҡ уға.* А. Игебаев.

**3.** Үҙ-ара һүҙгә килешеү, ҡара-ҡаршы әйтешеү; талашыу. *Сафуан .. прииискыла уҙғарылған йыйылыштарҙа сәкәләшкәндә үҙ һүҙен өҫтөн ҡалдыра алмай, халыҡ алдында хур бул[ды].* Я. Хамматов. *Яшинский менән фекерҙәш булырға ла, сәкәләшергә лә бер кем ашыҡмай.* З. Биишева.

**СӘКӘН** [1] *и.* **1.** Көҙ уйнай торған туп һуғыу уйыны (уҙаҡлашып ике төркөмгә бүленәләр; һәр уйынсыла — кәкре башлы таяҡ, бөтәһенә

бер ағас туп — сөр; алыҫ ара ҡалдырып, ике сик һыҙыла, ике сик араһында урталыҡ билдәләнә; урталыҡҡа сөрҙө һалып торалар ҙа, кем өлгөрөрҙән һуғып ебәрәләр; бер төркөм бер осҡа, икенсе төркөм икенсе осҡа табан сөрҙө һуғып, сиктән үткәрергә тырыша; ҡайһы төркөм үткәрә — шул бер мәрәй ала). *Көҙ етеү менән малайҙар урам тултырып сәкән һуға.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** (*йәки* **сәкән таяғы**) Шул уйында уйнай торған кәкре башлы тос таяҡ. *Сәкән яһау. Сәкән менән туп һуғыу.* ■ *Иртәгеһен малай бер сәкән, бер туп яһай* (Әкиәттән).

**СӘКӘН** [2] *и.*, **кукуруз сәкәне** Кукуруздың орлоҡло башы.

**СӘКӘН** [3] *и. диал.* Суптар.

**СӘКӘНЛЕ** *с. диал.* Суптарлы. *Сәкәнле таҫтамал.*

**СӘКӘНӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Сөкүнәт. *Йырткыс хайуандар кул саба, башкалары сәкәнәт итә.* М. Ғафури.

**СӘКӘҮ** *к.* Ҡуша төкөтөү. *Сулпан .. маңлайын атаһының маңлайына килтереп сәкәй яҙҙы.* Р. Ғабдрахманов.

**СӘКӘШЕҮ** *к.* **1.** Үҙ-ара төкөшөү, ҡуша килеп бәрелешеү. *Стакандар сәкәште лә бушап кире ултырҙы.* Ф. Иҫәнғолов. *Ҡыштың ҡара төнө юл сатында елдәр сәкәшә.* Ғ. Мәсғүт.

**2.** *диал. кар.* **сәкәләшеү** 2.

**СӘКӘШТЕРЕҮ** *к.* **1.** Нимәнелер ҡуша төкөтөү бер-береһенә бәреү. *Рюмкаларҙы сәкәштереү. Сәкәштерә һуғыу.* ■ *Сәкәштермәҫ элек тостарҙы тик бер нисә һүҙем тағы бар.* Ш. Галин. *Биктимер туҫтаҡтарҙы сәкәштергән булып, аждаһанығын үҙе эсә* (Әкиәттән).

**2.** *кусм.* Үҙ-ара талаштырыу. *Кешеләрҙе сәкәштереү.*

**СӘКАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тамуҡ. *Эй, Маһира .. Ялҡының бар яндырырға уйлағанда, туңдырһаң да уҙ кулыңда сәкарың бар.* Ш. Бабич.

**СӘЛБИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Кире, насар. *Эшселәр араһында революцион хәрәкәт көсәйә. Беҙ һуғышты һуҙһаҡ, шул яктан да сәлби һөҙөмтә киле сығыуы бик мөмкин.* Д. Юлтый.

**СӘЛДЕРЕҮ** *к. һөйл.* **1.** Һорамай, йәшереп алыу; урлау. *[Апуш:] Иҫәр булғанмын да инде: уны-быны уйлап тормаҫтан, бер әбейҙең һатырға тип баҙарға килтергән бер пар быймаһын тот та сәлдер.* Н. Иҙелбай. *Сәлдергән майын ягылтып тырпайған мыйығына, һары бесәй атылып килеп менде өй ҡыйығына.* А. Игебаев.

**2.** *кусм.* Ҡулға төшөрөү; эләктереү.— *Өйләнер булғас, кәләштең дә еллеһен сәлдереп килергә тырыш инде.* Д. Исламов. *«Ниндәй уңған ҡыҙҙы сәлдерҙе!» — тип, ҡай берәүҙәр көнләшеп тә йөрөнө Ғәзиздән.* Ә. Атнабаев.

**СӘЛЕҮ** [1] *к. кар.* **сәлдереү**. *«Кәкте», «сәлде» һәм ул «һөрттө», кәрәк урында «төрттө», әммә «урланы» һүҙен тик Букәншин белмәй төптө.* С. Кулибай.

**СӘЛЕҮ** [2] *к. диал.* Эсеү (иҫерткес эсемлекте). *Ярты сәлеү.*

**СӘЛЛӘ** [*ғәр.*] *и.* Мосолман ирҙәрҙең баш урамаһы; салма. *Аҡ сәллә. Сәллә урау.* ■ *Ауылдың муллаһы сәлләһенең койрогон кутәреп түбәтәйенә ҡыҫтырған да, аягын бөкләп, түрҙәге өлкән яҫтыҡ өҫтөнә ултырған.* Ғ. Дәүләтшин. *Һуҙһаң, Мәскәүгә етерлек муллаларҙың сәлләһе* (Халыҡ йырынан).

**СӘЛЛӘЛЕ** *с.* Сәллә ураған. *Хәҙрәттең тирә-ягын төрлө йәштәге, һәммәһе лә сәлләле булған мөриттәр солгап алған.* М. Ғафури.

**СӘЛПӘК** *и. диал. кар.* йәймә [1].

● *Ас кешегә еҫесән сәлпәк еҫе тәмлерәк. Әйтем.*

**СӘЛСӘБИЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Мосолман диненсә, ожмахтағы һыуы бик тәмле шишмә; силсәбил. *«Һеү әл-хак»,— тип уҫкән ожмахта улар, сәлсәбилдәрҙә йыуынғандар былар.* Ш. Бабич.

**2.** *кусм.* Тәмле һыу.

**СӘЛТЕР** *и. диал.* Балтыр.

**СӘЛӘМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Именлек, иҫәнлек теләү һүҙе. *Ярлыларға уҡый шәфкәт, сәләм, йәйелә төрлө яҡҡа яҡтыһы.* Д. Юлтый.

**2.** Күрешкәндә иҫәнлек теләү һүҙе. *Айбулаттың сәләмән ул [Ныязғол] бик акрын ғына ҡабул итте, тешен ҡыҫып ҡына яуап бирҙе.* Һ. Дәүләтшина. *[Дейеү — Батырмәргәнгә:] Сәләмең булмаһа, мин һине икегә өҙөп ҡапҡан булыр инем, ти* (Әкиәттән). **Сәләм биреү** иҫәнләшеү, иҫәнлек һорашыу (ғәҙәттә әссәләмәғәләйкүм, сәләм һүҙҙәре менән). *Һирәк кенә ерән һаҡаллы кеше.. нәҙек кенә тауыш менән: «Әссәләмәғәләйкүм, йәмәғәт»,— тип сәләм бирҙе.* М. Тажи. **Сәләм алыу** яуап итеп иҫәнләшеү. *Мин уға сәләм бирҙем, ул сәләм алды, ентекләп йөҙһынымa, өҫ-башыма күҙ һалды.* С. Кулибай. / Кеше йәки хат аша ебәрелгән иҫәнлек-һаулыҡ теләге. *Ҡайнар сәләм. Сук-сук сәләм. Сәләм ебәреү. Сәләм күндереү. Сәләм тапшырыу. Сәләм яҙыу. Тел сәләме.* ■ *Хаттар килә, хаттар килә, еңеп ҡыш сәмен, алып килә улар дуҫтар сәләмен.* Р. Назаров. *Осоп барған ҡош артынан әйтегеҙ беҙгә сәләм* (Бәйеттән). **Сәләм хаты** иҫәнлек-һаулыҡты белдергән, теләгән хат. *Сәләм хаты юк был араларҙа, иҫән-имен, һау микән* (Халыҡ йырынан).

**3.** Кеше йәки хат аша ебәрелгән хәбәр.— *Әле әсәм дә: «Арыу ғына тораһығыҙ, мал-йән һау, тыныс йәшәйһегеҙ. Шөкөр тигән көнөгөҙ бар. Ошо картайған көнөбөҙҙә атаң менән беҙҙе ҡунаҡ итеп алһағыҙ ни була?» — тип сәләм ебәреп ята.* Ғ. Дәүләтшин.

**СӘЛӘМЛӘҮ** *к.* **1.** Ололап, ҙур хөрмәт белдереп иҫәнләшеү (ғәҙәттә әссәләмәғәләйкүм, сәләм һүҙҙәре менән). *Баш эйеп сәләмләү. Сәләмләп күрешеү.* ■ *Ҡотлояр урынынан һикереп тороп, ҡунаҡты ҡыҫҡырып сәләмләп ҡаршы алды.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Тәбрикләү, ҡотлау. *Мин бөгөн дә еңеп ҡайтам, шуға май ҡояшы иркә сәләмләй.* Ғ. Әмири. *Кремль өҫтөндә ал байраҡ тулҡынып яныр тора; кешеләр, уны сәләмләп, ташҡынып ағып тора.* Р. Ниғмәти.

**СӘЛӘМЛӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **сәләмләү**. *[Сауҙагәрҙәр] буректәрен һалып, һуҙһеҙ генә сәләмләшеп китә.* А. Карнай.

**СӘЛӘМНАМӘ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Сәләм хаты. *Хәбәрең юк, үҙең юк, сәләмнамә һуҙең юк* (Әкиәттән).

**СӘЛӘМӘ** *и. диал. кар.* **алама** [1] 1.

**СӘЛӘМӘТ** [*гәр.*] *с.* **1.** Ауырымаған, сырхауһыҙ; иҫән-һау. *Сәләмәт кеше. Сәләмәт йөрөү.* ■ *Беҙ .. бөгөн дә һау-сәләмәтбеҙ. Ул тарафта һеҙҙең дә сәләмәт йәшәүегеҙҙе теләп калабыҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Боҙолмаған, имен, таҙа. *Сәләмәт акыл. Сәләмәт күңел.*

**СӘЛӘМӘТЛЕК** *и.* Ауырымаған, таҙа хәл; иҫәнлек, һаулыҡ. *Сәләмәтлекте ҡаҡшатыу. Сәләмәтлекте нығытыу. Сәләмәтлекте тикшереү.* ■ *[Сәгиҙә — Зыяга:] Һинең сәләмәтлегең шәптән түгел, мин уны һиҙеп торам, ә һин минән йәшерәһең.* М. Тажи.

**СӘЛӘМӘТЛӘНДЕРЕҮ** *к.* **1.** Сәләмәт итеү, һауыҡтырыу, шәбәйтеү. *Баланы сәләмәтләндереү.* ■ *Халыкты сәләмәтләндереүҙә иң мөһим нәмә — уны юғары гигиена культураһына ылыҡтырыу.* В. Ғүмәров.

**2.** *күсм.* Имен, төҙөк, яҡшы хәлгә килтереү; төҙәтеү, йүнәтеү. *Тормош шарттарын сәләмәтләндереү. Үҙ-ара мөнәсәбәтте сәләмәтләндереү.* ■ *Специаль сәрмая һәм ағымдағы производство расходтары иҫәбенә хеҙмәт шарттарын сәләмәтләндереү эше яҡшы үк алға киткән.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**СӘЛӘМӘТЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Сир бөтөп, таҙа хәлгә килеү; һауығыу, шәбәйеү. *[Асма — Ғафурга:] Борсолма, .. оҙаҡ кына хәл йыйэле, сәләмәтләнәм.* Ғ. Ғәйнуллин. *Шешәне үҙе тотоп, ярты һыуҙы эскән икән, [егет] бөтөнләй сәләмәтләнеп, көс-хәл кереп, аяғына баҫкан* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Имен, төҙөк, яҡшы хәлгә килеү; төҙәлеү, йүнәлеү. *Хеҙмәт шарттары сәләмәтләнде. Үҙ-ара мөнәсәбәт сәләмәтләнде.*

**СӘЛӘХИӘТ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Һәләтлек. *Эйелеү сәләхиәтен юғалтыу.* ■ *Бала — саф бер инсандыр, өйрәтһәң, һәр нәмәне белер, шулай булһа ла кәбилиәт вә сәләхиәт төрлөсәлер.* З. Һаҙый.

**СӘЛӘХИӘТЛЕ** *с. иҫк.* Һәләтле. *Һәр төрлө һөнәргә сәләхиәтле балалар бик күптер.* З. Һаҙый.

**СӘЛӘХИӘТЛЕК** *и. иҫк. кар.* **сәләхиәт.** *Минең эшкә сәләхиәтлегем булған, күрәһең, бик тиҙ күтәрелдем.* И. Насыри.

**СӘЛӘХИӘТҺЕҘ** *с. иҫк.* Һәләтһеҙ.

**СӘМ** *и.* Минлек тойғоһо; намыҫ, ғәр. *Сәм килеү. Сәм уятыу. Сәмгә тейеү.* ■ *Һары бөртөктәр ни тиклем күберәк табылһа, Ғәйзуллала старателдәргә хас тыйылғыһыҙ дәрт һәм сәм арткандан-арта барҙы.* Я. Хамматов. *Өс егет йөрөй артымдан алам тигән сәм менән.* Ш. Бикҡол.

**СӘМА** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Күк йөҙө, күк. *Ут-йәшендәй гөрләрмен, ерҙән сәмаға үрләрмен.* Д. Юлтый.

**СӘМАҒИ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Яҙылмаған, телдә генә йөрөгән. *Сәмаги бер тарих.*

**СӘМАУАТ** [*гәр.*] *и. күпл. кар.* **сәма.** *Сәмауаттан был донъяга инмәҫ борон хурҙар менән нур тауында шыугаһыңдыр.* Ш. Бабич.

**СӘМАУИ** [*гәр.*] *с. иҫк.* **1.** Күктәге, күк йөҙөндәге; күккә, күк йөҙөнә мөнәсәбәтле. *Сәмауи есем. Сәмауи киңлек.*

**2.** *күсм.* Ысынбарлыҡтан ситтә торған, уйҙырма, буш. *Һөйөү, выждан, иман, хаҡлыҡ кеүек матур һүҙҙәр — иҫкән ел генә; улар — сәмауи һүҙ, күктә улар, уларҙы тик һөйләй тел генә.* Ш. Бабич.

**3.** *күсм.* Матур, нурлы. *Нур һибә ен кыҙҙарының сәмауи күҙҙәре.* Б. Мирзанов.

**СӘМАХӘТ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Йомартлыҡ. *Был фәкир бәндә фәнүн гилемдән үҙенең хазинаһында барынса уларга яуап бирмәк илә сәмахәт күрһәтеп, уларҙы иршад вә делшад эйләне.* «Батыршаның хаты».

**СӘМБӘРӘ** *и. диал.* Иләк тирәсе.

**СӘМҒАН** [*гәр.*]: **сәмған вә тағатан** тыңлайым һәм буйһонам (түрәнең бойороғона яуап итеп әйтелә).

**СӘМӘҒ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит. кар.* **колаҡ** 1. *Шул ваҡыт сәмгемдә төрлө иҫке моңдар сыңлаша.* Ш. Бабич.

**СӘМИН** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Һимеҙ. *[Иблес] бер йыуаш гифриткә атланган ләгин. Ғифрите ай-яй йыуан, ай-яй сәмин!* Ш. Бабич.

**СӘМИТ** [*гәр.*] *и.* Бирге Азия, Төньяҡ һәм Көнсығыш Африкала йәшәгән халыҡтар төркөмө, уларға боронғоларҙан — вавилон, ассириялы, финикиялы йәһүд һ. б., хәҙерге халыҡтарҙан — ғәрәп, сириялы, еврей, эфиоп һ. б. халыҡтары ҡарай. *Сәмит халкы. Сәмит телдәре.*

**СӘМЛЕ** *с.* Намыҫсан, ғәрсел, сәмсел. *Сәмле һунарсы. Сәмле булыу.* ■ *Барыбер һүҙен һүҙ итте [Зөфәр]. Атаһы мәрхүм дә шулай сәмле кеше ине.* Ә. Гәрәев. *Күңелемдә ике көндәш йәшәй, икеһе лә сәмле, тынғыһыҙ.* В. Әхмәҙиев.

**СӘМЛӘНДЕРЕҮ** *к.* **1.** Мин-минлек тойғоһон уятыу; намыҫландырыу, ғәрләндереү. *Ҡайһы берәүҙәр уны [Батырҙы] сәмләндереп: «Дөйәләй кәүҙәң менән шул төймәләй ҡартты йыға алмайһың»,— тине.* И. Ғиззәтуллин. *[Егеттең һүҙе] Рәхимде сәмләндереп ебәрҙе. Ул, осоноп, һикереп торҙо: — Мин һинән ҡалышып тормам!* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Нимәгәлер дәрт тыуҙырыу, ҡеүәт биреү. *Эшкә сәмләндереү.*

**СӘМЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Мин-минлек тойғоһона бирелеү; намыҫланыу, ғәрләнеү. *Сәмләнеп эшләү.* ■ *Тәүге йылда уңыш күп булманы, тәжрибәм дә аҙ ине, ләкин күңелем һүрелмәне. Икенсе йылына сәмләнеп тотондом.* Р. Низамов. *Аҡназар .. көнө буйы урманды ҡыҙырып, бер йәнлек тә тап итә алмаған. Быға ул бик сәмләнгән* (Әкиәттән).

**2.** Дәртләнеү, ғәйрәтләнеү. *Өлкән лейтенант Хәбировтың орудиелары сигенеүсе дошманды сәмләнеп тураҡларға тотонды.* Ә. Ихсан.

**СӘМЛӘНЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **сәмләнеү.** *Сәмләнешеп эшкә тотоноу.* ■ *Бил ауыртаа башланы. Шулай ҙа туктап тороу юк, һаман сәмләнешеп утайбыҙ.* Н. Мусин.

**СӘМЛӘШЕҮ** *к.* Намыҫ итеп, үҙ-ара ярышыу; бер-береңдән уҙҙырырға тырышыу. *Сәмләшеп йәшәү. Сәмләшеп эшләү.* ■ *Ныязгол йыйган мәжлестә Айбулат Ҡотлобай менән сәмләшеп бейей.* М. Минһажетдинов. *Һуғыш туҡталып, өйөнә ҡайтҡас та, Хәйри үҙ донъяһын Имәнголдоҡо кеүек короп ебәрер өсөн күпме сәмләште.* Ғ. Ибраһимов.

**СӘМРЕҒОШ** *и.* **1.** Әкиәттәге бик ҙур мифик ҡош. *Сәмреғош балаһы. Сәмреғош ояһы.* ■ *Сәмреғоштоң ҡанат осо әҙ генә ҡағылып ҡалһа, ҡая таштар емерелеп төшә, ти* (Әкиәттән).

**2.** Батша гербындағы ике башлы ҡош һүрәте. *Госпиталдең алды таш бағана, сәмреғошҡайҙың да һүрәте* (Халыҡ йырынан).

**СӘМРӘҮ:** **сәмрәү ҡош** *кар.* **сәмреғош** 1.

**СӘМСЕЛ** *с. кар.* **сәмле.** *Сәмсел кеше.* ■ *«Ауылыбыҙ менән мәсхәрәгә ҡалабыҙ бит, ағай-эне!» — тип урһәләнергә керешә беҙҙең сәмсел ҡоҙабыҙ.* М. Кәрим.

**СӘМСӘ** *и.* Күндән эшләнгән нәмәгә яһалған биҙәк. *Ҡуҫҡар сәмсә. Ҡайылған сәмсә. Итек уксғһенә сәмсә һалыу.*

**СӘМСӘЛЕ** *с.* Ҡуҫҡарлап, биҙәкләп сигелгән. *Сәмсәле ҡата.* ■ *Ҡатындың аяғында .. бейек күтәрмәле, сәмсәле ситек.* С. Агиш. *Тибенгеһе сәмсәле, болан тире таралғы, өҙәнгеһе көмөштән.* «Урал батыр».

**СӘМСӘЛӘҮ** *ҡ.* Күн нәмәне сигеп йәки ҡуҫҡарлап биҙәү, биҙәк һалыу. *Ситекте сәмсәләү.*

**СӘМҮМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Эҫе сүл еле. *Хыялында ул [Гёте] гәрәп ҡом сахраларында гиҙә, оазистарына һоҡлана, гәжәйеп сағымдарға, сәмүмдәргә тап була.* Ғ. Хөсәйенов. *Сәмүм еле иҫә һыҙғырып.* М. Сөндөклө.

**СӘМӘР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Емеш.

**2.** *күсм.* Һөҙөмтә. *Милләт өсөн бурыслыбыҙ һәр беребеҙ, тиҙ ҡушылһын бер урынға фекеребеҙ, булмаһын сәмәребеҙ яңғыҙ һүгеш!* М. Ғафури.

**СӘМӘРЕҮ** *ҡ. диал. кар.* **шәмәреү** 2. *Иларға етешеп сәмәреп тороу.*

**СӘНАИҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Сәнғәт. *Сәнаиғ мәктәбе.* **Камил сәнаиғ** оҫта эшләнгән, сәнғәтсә камил нәмә. *Себер еле.. хикмәте тәбиғиә менән әшнә егеттәрҙең күңелдәренә үҙеңдең бер камил сәнаиғ икәнеңде урынлаштыра инең.* З. Өммәти. **Сәнаиғы нәфисә** һынлы сәнғәт. *Наркомпрос эргәһендә сәнаиғы нәфисә бүлеге ойошторола.* Д. Юлтый. **Һөнәр сәнаиғ** һөнәр сәнғәте. *Бәҙгә игенсе вә сауҙагәр балалары һөнәр сәнаиғы башҡаларҙан артыҡ күрер.* З. Һаҙый.

**СӘНҒӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ысынбарлыҡты художестволы образдар аша сағылдырыу эше, художестволы ижади эшмәкәрлек. *Сәнғәт оҫтаһы. Сәнғәт эшмәкәре. Сәнғәт әҫәре.* ■ *Конкрет тарихи осорҙан тыш сәнғәт тә, рәссам, музыкант йәки яҙыусы ла юҡ.* Ә. Хәкимов.

**2.** Художестволы ижади эшмәкәрлек тармағы. *Сәнғәт институты. Сәнғәт йорто. Театр сәнғәте. Һынлы сәнғәт.*

**3.** Берәй эштең үҙенә хас метод һәм алымдары булған өлкәһе. *Хәҙерге башҡорттарҙың биҙәү сәнғәтендә беҙ торбаслыларға хас булған тәңкә формаларының һаҡланыуын күрәбеҙ.* Н. Мәжитов. / Билдәле эш өлкәһендәге оҫталыҡ. *Тәржемә сәнғәте беҙҙең заманда һәр әҙәбиәттең айырылмаҫлыҡ өлөшө булып тора.* Ә. Вәли.

**СӘНҒӘТКӘР** [*фарс.*] *и. иҫк. кит. кар.* **һөнәрсе** 1.

**СӘНДЕР** *и. диал. кар.* **сандыр** [1] 1.

**СӘНИҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Эшләүсе, нимәлер яһаусы кеше; оҫта. *Шулай уны сәниғ күп гөлдәрҙән артыҡ итеп .. яратҡан.* Б. Мирзанов.

**СӘНКЕМ** *и.* Башҡорттоң бер ырыуы (ҡыпсаҡ ҡәбиләһенә инә).

**СӘНСЕЛДЕРЕҮ** *ҡ.* Юҡ итеү, дөмөктөрөү. *Ул [һалдат] автомат менән өс фашисты сәнселдерҙе.* Ә. Ихсан.

**СӘНСЕЛЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. кар.* **сәнсеү** [1] 1—3, 5. *Ағасҡа сәнселгән бысаҡ.*

**2.** Тәнгә инеү, ҡаҙалыу (төрлө осло, үткер нәмәләргә ҡарата). Бармағыма гөлйемеш энәһе сәнселде. / *күсм.* Күңелгә ауыр тәьҫир итеү. *Һуңғы һүҙҙәр Гөлйөҙөмдөң йөрәгенә сәнселде.* Ғ. Дәүләтшина.

**3.** Осло, үткер нәмәгә төртөләү, ҡаҙалыу. *Энәгә сәнселеү. Бысаҡҡа сәнселеү.*

**4.** *күсм. кар.* **сәнсеү** 5. *Төртмә һүҙ әйтеп кешегә сәнселеү.*

**5.** *күсм.* Юҡ булыу, юҡҡа сығыу, бөтөү; дөмөгөү. *[Әбей:] Әйҙә, ырыуы менән сәнселмәгәндәрме шунда тағы.* Т. Хәйбуллин. *Их, һин, тормош! — тинек әсенеп. Кем генә һең уйлап тапҡан һине, китмәйһең дә шунда сәнселеп.* Р. Ғарипов.

◆ **Сәнселгер** әрләгендә, ҡарғағанда әйтелә.

**СӘНСЕЛМӘ** *с.* Бик текә. *Сәнселмә тау.*

**СӘНСЕМ** *и.* **1.** Бер сәнсеп алырлыҡ күләм. *Өс сәнсем һалам.*

**2.** *диал. кар.* **күтәрем** 2.

**СӘНСЕМЛӘҮ** *ҡ.* Сәнсемдәргә бүлеү, сәнсем-сәнсем итеү. *Бесәнде сәнсемләп алыу.*

**СӘНСЕҮ** [1] *ҡ.* **1.** Осло нәмәне ҡайҙалыр төртөп индереү; ҡаҙау. *Таяҡты ергә сәнсеү.* ■ *Гөлбанат әбей иләп ултырған орсоғон тәрәшләгә сәнсеп, урынынан торҙо.* М. Ғафури. / Осло нәмә менән тәндә тишә төртөү, ҡаҙау. *Арҡаға сәнсеү. Йөрәккә сәнсеү. Күкрәккә сәнсеү. Бысаҡ менән сәнсеү.* ■ *Батша .. ҡатынын сәнсеп үлтермәк булды, ти* (Әкиәттән).

**2.** Тәнгә инеп төртөләп ауырттырыу (осло, сәнскәкле нәмәләргә ҡарата). *Ҡурай еләге сәнскәкле, сәнсә.* / Тәндә сәнскәк ҡаҙалғандағы йәки тишә төрткәндәге һымаҡ ауыртыу һиҙеү. *Арҡа сәнсә. Күкрәк сәнсе. Сәнсеп ауырта.* ■ *Асыу һәм ҡайғынан уның [Ямаштың] йөрәге сәнсеп ҡуя.* Ш. Насыров. *[Сергей] сәнсеп һыҙлаған башын боҙ ҡырыйына һалды.* А. Абдуллин.

**3.** Нимәләр теккәндә энә менән епте туҡымаға үткәреү. *Аша сәнсеү. Сәнсеп алыу.*

**4.** Текә итеп күтәреү (ҡойроҡ, ялды). *Матур күренә йылҡылар, ҡойроҡ сәнсеп, уйнап сапҡанда.* Т. Йәнәби. *Ҡолаҡтарын текә сәнсеп бышҡырҙы аттар.* М. Тажи. / Аяҡты тубыҡтан бөгөп текә итеп ҡуйыу. *Аяҡты сәнсеп ултырыу. Аяҡты сәнсеп ятыу.* ■ *Әхмәтғәле яҙғы таңға кинәнеп, тубығын сәнсеп ултырҙы.* Р. Низамов. / Туп-тура төбәү. *Иҙелдең уң яғында маңлайҙарын көнъяҡҡа сәнсеп, яланғас тауҙар тора.* Ж. Кейекбаев. *Һылыу ҡыҙыл кәпек сәнсеп матурлыҡты ҡуҙләне.* Ғ. Ибраһимов.

**5.** *күсм.* Йәнгә тейер һүҙ әйтеү, зәһәрле һүҙ менән төрттөрөү. *«Түрә бисәһенә сиратһыҙ ҙа ярай, ти бит“,— тип Нәсимә тағы сәнсте.*

Һ. Дәүләтшина. *Әйткән бер һүҙе һорауға яуап кына түгел, ә һине сәнсеп ҡуйыу.* С. Агиш.

**6.** *күсм.* Үтә тишкән кеүек итеү (ҡараш-ҡа ҡарата). *Сәнсеп ҡарау.* ■ *Һүҙгенәйен әйтмәй сәнсеп үтә, гишкы менән әллә үлһен тип* (Халыҡ йырынан).

**СӘНСЕҮ** [2] *и.* Тән ағзаһының бысаҡ һ. б. менән төрткәндәге һымаҡ булып ауыртыуы. *Йөрәгемде ҡаты сәнсеү алды ҡапыл үткән төндә.* М. Кәрим.

**СӘНСЕШЕҮ** *к.* **1.** *урт. ҡар.* **сәнсеү** [1] 1, 4, 5. *Ҡолондар ҡойроҡ сәнсешеп уйнап йөрөй.*

**2.** *һөйл. ҡар.* **сәнсеү** 2. *Роза ҡыуағы энәле, сәнсешә. Арҡа сәнсешеп ауырта.*

**СӘНСКЕ** [1] *и.* **1.** Сәнсеп алып ашай торған ҡорал. *Сәнске менән ашау.* ■ *Мәфтуха башта итте сәнске менән тоткайны ла, беренсе алған ите ауыҙына етер-етмәҫ төшөп китһкәс], сәнскене ҡабат алманы.* С. Агиш.

**2.** Сәнсә, ҡаҙала торған бәләкәй генә осло нәмә. *Тимерсыбыҡ сәнскеһе.*

**3.** *диал.* Һалдау. *Сәнске менән сыраҡҡа төшөү.*

**4.** *диал. ҡар.* **сәнскәк** 1. *Балыҡ сәнскеһе. Гөлйемеш сәнскеһе.*

**СӘНСКЕ** [2] *с. һөйл. ҡар.* **сәнскеле** 2. *Сәнске һүҙ.*

**СӘНСКЕЛЕ** *с.* **1.** Осло, үткер, остары тырпайып торған. *Сәнскеле тимер сыбыҡ кәртәләр окоптарҙың алдында рәт-рәт булып теҙелгән.* А. Таһиров. *Һәр ике һалдатҡа сәнскеле сыбыҡтарҙан эшләнгән рогаткалар күтәрергә ҡушты-лар.* Д. Юлтый.

**2.** *күсм.* Кешенең йәненә, намыҫына тейгән; төртмәле. *Сәнскеле таҡмаҡ. Сәнскеле һорау.* ■ *Муллалар уны [Ишмәмәтте] яратмай. Сөнки ул муллаларға «бәлеш ҡорто», «гөшөр ҡарғаһы» кеүегерәк сәнскеле һүҙҙәр ыскындыра.* А. Карнай. *Ҡыҙ шофёрҙарҙың сәнскеле көләүҙәренә бер ҙә иҫе китмәүен күрһәтергә теләне.* Д. Исламов.

**3.** *ҡар.* **сәнскәкле.** *Сәнскеле ағас.* ■ *Беҙ Вәкил менән һалам күбәһендә уйнай башланыҡ. Бында рәхәт, тик елкәгә сәнскеле кәбәк кенә тула.* Ғ. Аллаяров.

**СӘНСКЕЛӘҮ** *к.* **1.** Ҡабат-ҡабат, бер нисә урындан сәнсеү. *Сәнскеләп бөтөү. Энә менән сәнскеләү.*

**2.** Төртмә һүҙҙәр әйткеләү, сәнсеп-сәнсеп алыу, сәнсеү. *Ҡыйыу ҡыҙҙар Талханы төрлө һүҙҙәр менән сәнскеләнеләр: — Абау! Мөхәббәтһеҙ! Кит бынан.* Ж. Кейекбаев.

**СӘНСКЕС** *и.* Сәнсә торған төрлө ҡорал.

**СӘНСКӘК** *и.* **1.** Ҡайһы бер үҫемлек япраҡтарының үҙгәреп, осло энә рәүешен алған үҫентеһе. *Энәлек сәнскәге.* ■ *Беләм, йыуаштарға ауыр, сәнскәге бар хатта сәскәнең.* Р. Бикбаев. / Ҡайһы бер йән эйәләренең тәнендә була торған энә һымаҡ үҫенте. *Балыҡ сәнскәге.*

**2.** Сәнсә торған энәһе күп булған үләндәргә ҡарата. *Сәнскәк орлоғо.* ■ *Бөргәк, сәнскәк кеүек үләндәр араһында .. емешле ҡыуаҡтар ҙа күренеп ҡала ине.* Ғ. Дәүләтшин.

◆ **Һыйыр сәнскәге** *диал.* уҡра.

● *Ҡыҙыл гөл сәнскәкһеҙ булмай.* Мәҡәл.

**СӘНСКӘКЛЕ** *с.* Сәнсә торған энәле (үҫемлеккә ҡарата). *Сәнскәкле гөл. Сәнскәкле үлән.*

**СӘНСКӘКЛӘҮ** *к.* Уҡра себененең ҡаяуына сыҙамай, ҡойроҡ сәнсеп сабыулау (һыйыр малына ҡарата). *Көн ҡыҙа башлау менән һыйыр малы сәнскәкләп өйгә ҡайтыу ягын ҡарай башлай.* Һ. Дәүләтшина. *Яҡын-тирәлә эҫе көндә сәнскәкләп йөрөгән һыйыр көтөүҙәре лә күренмәҫ булды.* Т. Сәғитов.

**СӘНСКӘКЛӘШЕҮ** *к.* Төрлөһө-төрлө яҡҡа сәнскәкләп таралыу, сабыу. *[Ҡарамырҙа:] Һалҡын кәртәгә быҙауҙарҙы ла ҡаматығыҙ! Сәнскәкләшеп китеп бармаһын.* Х. Ғәбитов.

**СӘНСТЕРЕҮ** *к.* **1.** *йөкм. ҡар.* **сәнсеү** [1] 1, 2. *Билге итеп таяҡ сәнстереү. Энә менән сәнстереү. Ҡулды сәнскәккә сәнстереү.*

**2.** *күсм.* Әсе һүҙ менән төрттөрөү, әсе көләү; сәнсеү. *Исемдәре ҡара таҡтаға эләккән яңғыҙаҡтар ҡайғырышалар. .. Ә Ғариф ағай уларға уйынлы-ысынлы сәнстерә генә: — Күтәргәндәр дандарын, күтәргәндәр.* Б. Бикбай.

**СӘНСӘ** *и. диал.* Сыңғарсай. *Сәнсә бармаҡ.*

**СӘНШӘ** *и. иҫк.* Тышлап тегелгән мамыҡлы ҡыҫҡа кейем.

**СӘНӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Йыл. *Һабаҡ уҡып ун биш сәнә.., файҙа алманым әҙ генә лә.* М. Ғафури.

**СӘНӘҒИ** *с. иҫк. кит.* Тәбиғи түгел, эшләнгән, яһалма. *Һарайҙың сәнәғи күле сайҡала башлай.* Ғ. Рафиҡи.

**СӘНӘҒӘТ** *и. иҫк.* Промышленность. *Ауыр сәнәғәт.* ■ *Башҡортостан .. иҡтисади яҡтан ныҡ ҡына алға баҡты, сәнәғәте көсәйҙе, ауыл хужалығы ла һиҙелерлек элекке хәлгә ҡайтты.* Т. Йәнәби. *Әле был ҡала ҙур сәнәғәткә эйә түгел әле, ләкин шулай булһа ла, ҡала ҡала инде.* Ғ. Хәйри.

**СӘНӘҒӘТЛӘШТЕРЕҮ** *к. иҫк.* **1.** Сәнәғәт йәһәтенән үҫтереү; индустриалләштырыу. *Илде сәнәғәтләштереү.*

**2.** Эре машина техникаһы менән тәьмин итеү; машиналаштырыу. *Ауыл хужалығын сәнәғәтләштереү.*

**СӘНӘД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ышаныслы дәлил, нигеҙ. *Мәсьәләнең сәнәден күрһәтеү.*

**2.** Рәсми ҡағыҙ, документ.

**СӘНӘМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит. ҡар.* **бот** [3]. *Тетрәһен ер, йөҙ түбән китһен сәнәмдәр сылтырап!* Ш. Фидаи.

**СӘНӘҮИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Йыллыҡ. *Сәнәүи керем. Сәнәүи үҫеш. Сәнәүи эш.*

**СӘҢГЕЛ** *с.* **1.** Көслө, яңғырауыҡлы, сағыу, сәңгер (тауышҡа ҡарата). *Сәңгел сыҡ. // Сәңгел яңғырау.* ■ *Һандуғастар һайрай сәңгел-сәңгел, ниндәй шәп тип гөлдә наҙ булыу.* К. Кинйәбулатова. *Боғаҙаҡтан аша йырлағанда, сәңгел сыға минең тауышым* (Халыҡ йырынан).

**2.** Сәңгетеп өшөткән; сатнама, сәңгер. *Сәңгел һыуыҡ.*

**3.** Күҙ яуын алырлыҡ асыҡ; сығыу, сәңгер. *Сәңгел һары.*

**СӘҢГЕЛДӘК** *и.* **1.** Йәш баланы һалып өсөн элеп ҡуймалы итеп яһалған ҡулайлама. *Сәңгелдәк сымылдығы. Сәңгелдәктәге бала. Сәңгелдәккә һалыу. Сеңгелдәкте бәүетеү.* ■ *Төпкө*

*мөйөшкә сәңгелдәк эленгән. Унда тумалаҡ алһыу битле, тулы кәүҙәле сабый йоклап ята.* Ф. Иҫәнғолов. *Сәңгелдәктә тулап балам ята.* В. Әхмәҙиев. **Сәңгелдәк йыры** *кар.* **йыр.**

**2.** *күсм. юғары* Нимәнелер барлыҡҡа килтергән, башлап ебәргән урын. *Ленинград — пролетар революцияның сәңгелдәге.* ■ *Көрәш тарихының сәңгелдәге тирбәтте лә беҙҙе үҫтереп, көрәш майҙанына бүләк итте, беҙ атылдыҡ уға туш килеп.* Ғ. Амантай.

**3.** Балаларға бәүелеп уйнар өсөн тағылған бау йәки баулы таҡта; әйелтмәк. **Сәңгелдәк әйеү** сәңгелдәктә бәүелеү. *Миҙхәт .. баҡсаға барып, түйгансы сәңгелдәк әйҙе.* Р. Ғабдрахманов.

**СӘҢГЕЛДӘТЕҮ** *к.* Ян-яҡҡа йәки аҫкаөҫкә талғын ғына һелкетеү; бәүетеү, бәүелтеү. *Аттың барышы менән .. сәңгелдәткәнгә Аҡназар тәүҙә калғып, һуңғараҡ ойоп китте.* Ғ. Дәүләтшин. *Башҡынайым минең бик ауырта, сәңгелдәтмәй барсы көймәмде* (Халыҡ йырынан).

**СӘҢГЕЛДӘҮ** *к.* Ян-яҡҡа йәки аҫка-өҫкә талғын ғына һелкенеү; бәүелеү. *Сәңгелдәп ятҡан һаҙлыҡ.* ■ *Йомшаҡ кына сәңгелдәп барған сағыбыҙҙа санабыҙ бер һалыуға төшөп кит[те].* Ғ. Дәүләтшин.

**СӘҢГЕМ-СӨҢГӨМ** *с.* Ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа йөрөгән, ғәҙәттә, ниндәйҙер шомло, йәшертен (һүҙ, хәбәргә ҡарата). *Сәңгем-сөңгөм һүҙ.* // *Сәңгем-сөңгөм һөйләшеү.* ■ *Халыҡ араһында сәңгем-сөңгөм әңгәмәләр күбәйҙе. Ошо айҡанлы ауыл ҡырҡа икегә айырылды.* Т. Хәйбуллин.

**СӘҢГЕР** *с. кар.* **сәңгел.** *Сәңгер ҡыҙыл. Сәңгер тауыш. Сәңгер һыуыҡ.*

**СӘҢГЕТЕҮ** *к.* Үҙәккә үткәреп һыҙлатыу. *Сәңгетеп, ялап алып барған саҫҡау һыуыҡ бөтәһен дә үҙенә бағындырҙы.* Т. Хәйбуллин. *Һөйәктәргә үтеп, сәңгетеп торған һыуыҡ ҡыш.* Ғ. Дәүләтшин.

**СӘҢГЕҮ** *к.* Үҙәккә үтеп, әсетеп һыҙлау; әрнеү. *Теш сәңгей.* ■ *Сәңгеп өшөп бөткән ҡул бармаҡтары, эҫе һыуға тыҡҡас, зымбырлап сәнскеләй.* Һ. Дәүләтшина.

**СӘҢГӘР** *с.* Ғәҙәттәге ваҡыттан һуң тыуған; йәйләүес, көҙләүес (быҙау, бәрәскә ҡарата). *[Хәсән:] Сәңгәр быҙау ул. Йәй тыуған.* Я. Вәлиев.

**СӘҢГӘСӘР** *с.* Быҙаулар йәшендә быҙауламаған, өс йәшенә хәтле тыу ҡалған (һыйыр малына ҡарата). *Сәңгәсәр тана.*

**СӘҢК** *окш.* Сәүек эттең нәҙек өҙөк тауышын белдергән һүҙ. *Сәңк итеү.*

**СӘҢКЕ** *с. һөйл.* Сәкеш. *Сәңке башлы йылан.*

**СӘҢКЕЛДӘК** *с.* **1.** Сәңк-сәңк өрөүсән. *Сәңкелдәк эт.*

**2.** *күсм. һөйл.* Нескә тауыш менән ҡысҡырып әрләгән, татылдап илаған. *Сәңкелдәк ҡатын.*

**СӘҢКЕЛДӘҮ** *к.* **1.** Сәңк-сәңк итеп өрөү; сәңк-сәңк килеү. *Фәниә тупһаға аяҡ баҫам тигәндә, ҡапыл сәңкелдәп өргән көсөк тауышынан һиҫкәнеп китә.* С. Кулибай.

**2.** *күсм. һөйл.* Тәтелдәп әрләү, илау һ. б. (нәҙек, нескә тауышлы кешегә ҡарата).— *Ҡыу инде аттарыңды,— ти Әнүәр, үҙе .. сәңкелдәп тороп илай.* С. Агиш.

**СӘҢКЕЛДӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **сәңкелдәү.** *Сәңкелдәшеп илау. Сәңкелдәшеп өрөү.*

**СӘҢКЕҮ** [1] *к.* Сәңк-сәңк итеп өрөү; сәңкелдәү. *Үҫлек менән эстән асыу ярып, сәңкепсәңкеп эттәр өрәләр.* Д. Юлтый. *Таң алдынан күрше Айтуғандың сәңкеп өргән бурҙай Ҡашкары.* М. Тажи.

**СӘҢКЕҮ** [2] *к. кар.* **сәңгеү.** *Бармаҡтарым сәңкеп өшөй.*

**СӘҢК-СӘҢК** *окш.* Ҡабат-ҡабат сәңк иткән тауышты белдәргән һүҙ. *Сәңк-сәңк итеү. Сәңк-сәңк килеү. Сәңк-сәңк өрөү.*

**СӘҢКӘЙЕҮ** *к. кар.* **саңкайыу.** *Сәңкәйеп атлау. Сәңкәйеп ултырыу.*

**СӘП** [1] *и.* **1.** Тоҫҡап атыр өсөн ҡуйылған билдә; мәрәй. *Сәпкә атыу. Сәпкә төҙәү.* ■ *Беренсе рубежда уҡ биш пуляның дүртеһе сәпкә тейҙе.* Р. Низамов. *Атылған уҡ, тылсымлы уҡ тейә тора сәпкә туҡ-туҡ.* Р. Назаров.

**2.** Атыр, утҡа тотор өсөн ҡорал йүнәлтелгән нәмә йәки урын. *Әнүәр .. ашыҡмаҫҡа, бомбаларҙы тик сәпкә ташларға тырышты.* Ш. Бикҡол.

**3.** *күсм.* Тәнҡитләү йәки ғәйепләү объекты булған кеше йәки нәмә. *Сәп итеп алыу. Сәпкә һайлап алыу.* ■ *Һүҙ уйнатыу арҙамында бик оҫта бирелгән был сарказм үҙ көсөнә ныҡ ышанған тыныслыҡ яклыларҙың һүгыш сукмарҙарынан мәсхәрәле көлөүе булып сәпкә бәрә.* Ғ. Хөсәйенов. *Эшләгән эш — мәңгелеккә киткән, әйткән һәр һүҙ сәпкә теҙгән саҡ!* Ә. Вахитов.

**СӘП** [2] *окш.* **1.** Тәнгә, һыулы нәмәгә ус йәки бүтән яҫы нәмә менән һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Сәп иттереп сикәгә һуғыу. Сәп итеп ҡалыу.*

**2.** Ауыҙҙы, иренде ҡапыл асып йомғанда сыҡҡан нескә тауышты белдергән һүҙ.

**СӘПЕК** *с. диал. кар.* **сибек** 1. *Сәпек кеше.*

**СӘПЕЛДӘМӘ** *и. һөйл. кар.* **сәперт.** *Сәпелдәмәлә һыу инеү.*

**СӘПЕЛДӘТЕҮ** *к.* **1.** Сәп-сәп иттереү; сәп-сәп тигән тауыш сығарыу. *Ҡулды сәпелдәтеү. Сәпелдәтеп йөҙөү. Һыуҙы сәпелдәтеү.* ■ *Ғәйзулла, уҡмашкан ләпәкәйҙәрҙе сәпелдәтеп һыға-һыға, ҡайын башынан ергә һикерҙе.* Я. Хамматов. *Часовойҙарҙың әленән-әле ҡысҡырып өндәшеүҙәре, бысраҡты сәпелдәтеп баҫҡан аяҡ тауыштары .. тынлыҡты боҙа.* Б. Дим.

**2.** Еүеш ирен менән сәп-сәп иттереү. *Ауыҙҙы сәпелдәтеү. Сәпелдәтеп ашау.* ■ *Максим тыржыҡ танауын сирып, иренен сәпелдәтеп алды.* Д. Исламов. *Инспектор .. итләс танауын тартып, ирендәрен сәпелдәтә-сәпелдәтә Фәизгә һабаҡ уҡырға тотондо.* В. Исхаҡов.

**СӘПЕЛДӘҮ** *к.* **1.** Сәп-сәп итеү, сәп-сәп килеү; сәп-сәп тигән тауыш сығарыу. *Сәпелдәп йөҙөү.* ■ *Күнәк тәрәндәге һыуға сәпелдәп бәрелде.* Ш. Янбаев.

**2.** Сәп-сәп итеү, сәп-сәп килеү (иренгә, ауыҙға ҡарата). *Ҡыуышта тынлыҡ урынлашты. Ауыҙҙар сәпелдәгәне генә ишетелде.* Р. Ғабдрахманов.

● *Аяғың тәпелдәмәһә, ауыҙың сәпелдәмәй.* Мәҡәл.

**СӘПЕЛДӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **сәпелдәү**. *Сәпелдәшеп һыу инеү.*

**СӘПЕРТ** *и.* Һыуҙың һай ғына сите. *Ҡул ситенә сәперткә сығып, йылыға ирәйешеп ятҡан ваҡ балыҡ көтөүе [тәлмәрйендән] өркөп, юҡ булды.* Ф. Иҫәнғолов.

**СӘПЕҮ** *к. кар.* **сәпәү**. *Сикәгә сәпеү. Сәпеп һылау.*

**СӘПЛӘҮ** *к.* **1.** Сәпкә [1] (1 мәғ.) төҙәү, тоҫҡау. *Сәпләп атыу.*

**2.** Сәпкә (2 мәғ.) төҙәп атыу йәки бәреү. *Таш менән сәпләү. Сәпләп ебәреү.*

**СӘПСЕК** *и.* **1.** Нәҙек оҙон кәүҙәле, бәүелсәк ҡойроҡло, йүгереп йөрөгән турғай. **Аҡ сәпсек** арҡаһы аҡһыл буҙ, түше, түбәһе ҡара, ҡорһағы менән бите аҡ төҫтәге сәпсек. *Аҡ сәпсеккәй осоп килер ҙә шул, аҡ ҡойроғо менән боҙ ярыр.* Р. Ғарипов. **Һарыбаш сәпсек** арҡаһы буҙ, башы менән ҡорһағы тотош һары, ҡанаты, ҡойроғо ҡара төҫтәге сәпсек. **Һары сәпсек** ҡорһағы һары, арҡаһы менән түбәһе йәшкелт, ҡойроғо көрәнһыу төҫтәге сәпсек.

**2.** *диал.* Турғай.

**СӘПСЕНЕҮ** *к.* Ярһыу, туҙыныу; сәпсеп китеү, сәпсәләнеү. *[Аллабирҙе — Сәлимгә:] Һай-һай, теленде әйтәм, ниндәй үткер ҡайралған. .. Еҙнәкәйеңде ниндәй тетеп һалдың!.. Көтмәгәйнем, балдыҙ, көтмәгәйнем. Ул тиклем сәпсенергә һиңә ни етмәй, ә.* А. Мөбәрәков. *Ҡоҙаһының был һүҙен ишетеп ултырған ҡоҙағый сәпсенеп ҡараһа ла, ни әйтергә белмәй* (Әкиәттән).

**СӘПСЕҮ** *к.* **1.** *һөйл.* Артылып ситкә һирпелеү; сайпылыу. *Сәпсеп түгелеү.*

**2.** *күсм.* Ярһыу, ҡыҙып китеп ауыр һүҙҙәр әйтеү, туҙыныу. *[Хәмит:] Туҡта әле, сәпсемә, һөйләгәнде көт. Ҡыҙҙың да киттең дәһә.* С. Агиш. *Һис тынғы юҡ янки — характарға, утҡа баҫҡан бесәй тиерһең, сәпсей улар.* Ш. Бикҡол.

**СӘП-СӨП, сәп тә сөп** *окш.* Ҡабат-ҡабат сәп [2] иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сәп тә сөп итеү.* ■ *Тиҙ генә эшләп өлгөртөлгән волейбол майҙанында сәп тә сөп туп сәпәнеләр.* Ф. Иҫәнғолов. *Әйек тулҡындары бала һымаҡ сәп-сөп һуға текә ярҙарға.* Ғ. Дәүләтов.

**СӘПСӘЛӘНЕҮ** *к. кар.* **сәпсенеү**. *[Зәлифә:] Беҙ бик сәпсәләнеп тә китмәйек әле, Миңлекәй. Илсенең суҡмары — сабырлыҡ, ти.* М. Кәрим.

**СӘП-СӘП, сәп тә сәп** *окш. кар.* **сәп-сөп**. *Сәп-сәп итеү.* ■ *Сайпылышып шатлыҡ тулҡындары сәп-сәп бәрелә күңелем ярына.* Ш. Бабич.

**СӘПСӘҮ** *и.* Турғайҙар ғаиләһенә ҡараған оҙон ҡыҙыл аяҡлы, оҙон моронло, йәшкелт һоро сыбар арҡалы, күгәрсендән бәләкәйерәк һыу ҡошо; сәтерйән.

**СӘПТЕР** *окш.* Һыу нәҙек кенә булып атылып аҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Сәптер итеү.*

**СӘПТЕРЕҮ** *к.* Нәҙек кенә булып атылып сығыу, бәреп ағып тороу (шыйыҡ нәмәгә ҡарата). *Һыу сәптерә. Сәптереп тороу.* ■ *Әсәһенең имсәгенән бер туҡтауһыҙ һөт сәптерә.* Й. Солтанов.

**СӘПТЕРЛӘТЕҮ** *к.* Сәптер-сөптөр иттереү; сәптер-сөптөр иткән тауыш сығарыу; сәптерләтеп ағыҙыу. *Һыуҙы сәптерләтеп кисеп килеү.*

**СӘПТЕРЛӘҮ** *к.* Сәптер-сөптөр итеү, сәптер-сөптөр килеү. *Кишкә генә күлдең төшлөгөнән сәптерләптәй аға бер йылға* (Халыҡ йырынан).

**СӘПТЕРЛӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **сәптерләү**. *Сәптерләшеп йыуыныу. Сәптерләшеп һыу кисеү.*

**СӘПТЕР-СӨПТӨР** *окш.* Нәҙек кенә булып атылып сыҡҡан һыу тауышын йәки һай ғына һыуҙы кисеп барғанда сыҡҡан йомшаҡ тауышты белдергән һүҙ. *Сәптер-сөптөр итеү. Сәптер-сөптөр һыу кисеп йөрөү. Сәптер-сөптөр килеү.*

**СӘПӘК** *и.* Һыйыр тиҙәген тиреҫкә ҡушып баҫып, сәпәп киптергән яғыулыҡ. *Сәпәк яғыу.*

**СӘПӘКЛӘҮ** *к.* **1.** Ус менән бер нисә тапҡыр һуғыу. *Гөлйемеш Хәмиттең ике яҡ сикәһен уңлы-һуллы сәпәкләргә тотонд*о. Ф. Рәхимғолова. *Балалары тыңлауһыҙланһа, айыу уларҙы сәпәкләп ала.* Н. Мусин.

**2.** *кар.* **сәпәкәйләү**. *Ҡул сәпәкләп ҡаршы алыу.*

**СӘПӘКӘЙ** *и.* Усты уҫҡа сәп-сөп һуҡҡан хәрәкәт. *Хәсән үҙе ҡул саба башланы ла башҡаларға ҡарап: — Әйҙә, сәпәкәй итегеҙ,— тине.* С. Агиш.

**СӘПӘКӘЙЛӘҮ** *к.* Сәпәкәй итеү, ҡул сабыу. *Сәпәкәйләп бейеү. Сәпәкәйләп таҡмаҡ әйтеү.*

**СӘПӘЛЕҮ** *к. төш. кар.* **сәпәү**. *Ситәнге сәпәлгән тиҙәк.*

**СӘПӘЛӘҮ** *к. һөйл. кар.* **сәпәкләү** 1.

**СӘПӘЛӘШЕҮ** *к. һөйл. кар.* **сәпәшеү**. *Икәүара сәпәләшергә генә торалар.*

**СӘПӘМӘ** [1] *и.,* **сәпәмә туп** *кар.* **туп** [1].

**СӘПӘМӘ** [2] *и.* Кер сайҡағанда туҡмай торған яҫы ағас; кер туҡмағы.

**СӘПӘТЕҮ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **сәпәү 1**, 2.

**2.** Яҫы ялпаҡ ташты һыу өҫтөнән ҡаҡсыта бәреү; кәйелтеү.

**СӘПӘҮ** *к.* **1.** Яҫы нәмә менән сәпелдәтә һуғыу. *Маңлайға сәпәү. Сикәгә сәпәү.* ■ *«Кит бынан, йүнһеҙ!» — тип, Алма уның [Әлгистең] ауыҙына сәпәне.* Ҡ. Ибәтуллин. *Юҡ, ташламай, һаман өҫкә килә, сәпәмәксе була яңаҡҡа.* Ҡ. Даян. / Бәреп тейҙереү, ҡундырыу.— *Фронтта осраһа, мин ул эттең ҡаҡ маңлайына бер осло моронд*о *сәпәйем.* М. Тажи.

**2.** Ҡуйы нәмәне ҡайҙалыр йәбештерә һуғыу. *Стенаға балсыҡ сәпәү. Сәпәп һылау.* ■ *[Әсәһе — Дилә*гә*:] Атайың ҡайтыуына .. ҡатыҡты ойот, тиҙәкте сәпәп ҡуй.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Устан уҫҡа һалып, ҡағып йомарлау. *Май сәпәү.* ■ *Гөлкәй әбей ылаш эргәһендә ҡорот сәпәп ултыра ине.* И. Көҫәпҡол.

**4.** *күсм.* Кешегә көтмәгәндә ниндәйҙер насарлыҡ ҡылыуға, күңелен ҡыйырһытҡан эш эшләүгә ҡарата әйтелә. *Насар билдәһе сәпәү. Шелтә сәпәү. Штраф сәпәү.* ■ *«Бурһыҡ» тип, Хәмзәгә яңы ҡушамат та сәпәп ҡуйҙы берәү.* М. Кәрим. *Атаһы директор тип торманылар, һуғышҡан өсөн тоттолар ҙа ике йылды сәпәнеләр.* З. Хисмәтуллин.

**5.** *кусм.* Атып үлтереү. *[Миңләхмәтов:] Берәүҙе сәпәнем, башка тура килгәне юк әле.* С. Әлибаев. *Беҙҙекеләр кырк ике фашисты сәпәгәндәр бит.* Ғ. Әхмәтшин.

♦ **Туп сәпәү** туп һуғып уйнау. *Кыҙ, шунда ук ятағына инеп, туп сәпәй торған сүместәрен алып сыкты.* Ф. Иҫәнғолов.

**СӘПӘШЕҮ** *к. һөйл.* Үҙ-ара тарткылашыу, бәргеләшеү. *Улар өсәү. Бишәү булһалар ҙа, сәпәшеүгә китһә, һынатмам.* К. Даян.

**СӘР** *окш.* Әсе итеп кыскырған тауышты белдергән һүҙ. *Сәр итеү.*

**СӘРАБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит. карт.* **сағым** 2. *Һин киләсәктән көтәһең әллә ниндәй якты көн, юк улар, бары ла хыял, күҙгә күренгән бер сәраб.* М. Ғафури.

**СӘРБИ** *и. кар.* **сәрүи** 1.

**СӘРБӘСТ** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Ирекле, азат. *Сәрбәст кеше.*

**СӘРГӘРҘАН** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Болокһоған, каушаған. *Сәргәрҙан кеше. // Күп гәрипләк күрһәм дә, зар, сәргәрҙан йөрөһәм дә, .. йөрөмәй күңелем тынмайҙы.* «Буҙйегет».

**СӘРҒӘСКӘР** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Ғәскәр башлығы. *Кыпсак үҙе Локман Хәким пәдәре Угызхан урҙаһында сәргәскәр булған.* «Башкорт шәжәләре», 1960.

**СӘРДИ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Һыуык. *Ғөрбәт эсрә калдыгы тәшнә хажиҙар өсөн, ас-ялангас бәгере бер йән аһ сәрдиҙәр өсөн.* М. Өмөтбаев.

**СӘРҘАР** [*фарс.*] *и.* Ҙур ғәскәр башлығы. *Шул сагында һүҙ артынан һүҙ ялганган, сәрҙар Каһым Кутуз батшаны мактаган* (Бәйеттән).

**СӘРҘӘ** *и.* Сатыр сәскәләләр ғаиләһенә караған эре ак сатыр сәскәле, өсәр-өсәр оҙонса япраклы, оҙон һабаклы урман үләне.

**СӘРЕ** *бәйл. диал.* Тиклем. *Ауылға сәре. Иртәгә сәре көт.*

**СӘРЕЛДЕК** *с.* Нәҙек, әсе (тауышка карата) / Ошондай тауышлы. *Сәрелдек кыҙ.* ■ *[Гөләйшәләрҙең] тағы сәрелдек, бәләкәй генә һарыкай кыҙҙары ла бар.* К. Кинйәбулатова.

**СӘРЕЛДӘТЕҮ** *к.* Сәр-сөр кыскыртыу, тауышландырыу. *Баланы сәрелдәтеү.*

**СӘРЕЛДӘҮ** *к.* Әсе, нәҙек тауыш менән йырлау, кыскырыу, һөйләү һ. б.; сәр-сөр килеү. *Аксарлактар сәрелдәп осалар.* ■ *Өләсәһе һөйләнә: «Кыҙым йырсы минең»,— ти, .. Маһая ла Әнисә, сәрелдәй бар көсөнә.* К. Кинйәбулатова. *Катын-кыҙ сәрелдәп, .. төрлө якка һибелде.* М. Кәримов.

**СӘРЕЛДӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **сәрелдәү**. *Сәрелдәшеп йүгереү. Сәрелдәшеп осоу.*

**СӘРИҒ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ашығыс, тиҙ. *Сәриғ эш. Сәриғ хәрәкәт.*

**СӘРИР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ултырған, яткан урын. *Былбылдар жәүлан кылыр сәририндә.* Акмулла.

**СӘРКЕЛДӘК** *с.* Нәҙек, әсе, колакты ярып барған (тауышка карата).

**СӘРКЕЛДӘҮ** *к.* Нәҙек, әсе тауыш менән кыскырып һөйләү. *Сәлимә теленә ни килде — шуны сәркелдәргә тотондо.* Ф. Иҫәнғолов.

**СӘРКЕЛДӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **сәркелдәү**.

**СӘРКӘНСӘК** *и. диал. кар.* **катлансык**[2].

**СӘРКӘТИП** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Секретарь. *Күп тә үтмәй, рәис менән сәркәтип һайланып, мәжлес асылды.* И. Насыри. *Байрам үткәс, бер оло мәжлес була: сәркәтип бер ен, рәис Иблис була.* Ш. Бабич.

**СӘРКӘШ** [*фарс.*] *с.* Үҙ һүҙен бирмәй талашкан; бәйләнсек, еңмеш. *Сауҙагәрҙең Усман исемле тупаҫ, сәркәш малайы Салихка көн күрһәтмәй.* Х. Мохтар.

**СӘРКӘШЛӘНЕҮ** *к.* Үҙ һүҙләнеп еңешеү.

**СӘРЛӘҮХӘ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Китап, яҙманың исеме, башы. *Шиғыры уның [шагирҙың] «нәхәүһеҙ» сәрләүхәле.* Ш. Бабич.

**СӘРМАЯ** [*фарс.*] *и.* Нимәнелер башлап ебәрер өсөн тәғәйенләнгән акса; капитал. *Сәрмая туплау.* ■ *[Садри:] Тукта, карайым әле, кеҫәләге сәрмая тейешле микдарҙы тәшкил итәме икән. .. Әһә, етерлек.* Ғ. Ибраһимов. *Бай үлгәндә балаһының гүмеренә етерлек сәрмая калдырған* (Әкиәттән).

**СӘРМИН** [*ғәр.*] *р. иҫк.* Айырым, бәйләнешһеҙ. *Сәрмин йәшәү.*

**СӘРМӘ** *и.* Тиренән, күндән тегелгән йәки кабыктан, сей йүкәнән үреп яһаған юл моксайы, кабы. *Һәүеҙә, кабык сәрмәнән күгәргән корот сыгарып, иренең алдына куйҙы.* Я. Хамматов. *Карт сәрмәһенән икмәк сыгара* (Әкиәттән).

♦ **Сәрмә кағыу** туйҙа кейәү яғынан килгән күстәнәскә һыйланыу. **Сәрме төбө** туйҙа хуш ашын ашаған, кыҙҙарҙың сәрмә тотоп, ишек төбөндә тороп йыйған бүләге.

**СӘРПҮШ** *и. диал.* Түбәсәй.

**СӘРПӘК** *и.* **1.** Нимәләр ватылғанда, ярылғанда барлыкка килгән йока ғына оҙонса бәләкәй киҫәк. *Осло сәрпәк. Агас сәрпәге. Сынаяк сәрпәге. // Сәрпәк утын.*

**2.** Кая таштың катланып торған һикәлтәһе. *Мәмерйәлә ярганат сәрпәккә һырыгып тора.*

**СӘРПӘКЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **сәрпәкләү**. *Сәрпәкләнгән таш. Сәрпәкләнгән утын.* ■ *Иңрәмәнем тешем сәрпәкләнһә, һыҙланманым тырнак канаһа.* Ш. Биккол. *Күсәкбей кирелеп атып ебәрә, ук ташка тейеп, таш сәрпәкләнеп сәсрәп китә.* «Бабсак менән Күсәк».

**СӘРПӘКЛӘҮ** *к.* **1.** Вак кына йока, буй-буй киҫәктәргә ярғыслау. *Һөйәкте сәрпәкләү.* ■ *Ағайым дошман калдырған минаға эләгеп шартлаған, ә ярсығы Рамазандың кулын сәрпәкләгән.* Т. Килмөхәмәтов. *Икенсе залп менән аласыктың такта кыйығын сәрпәкләнеләр.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *кусм.* Телгеләү, өҙгөсләү. *Беҙҙең йырҙар дошман йөрәген сәрпәкләһен бомба шикелле.* Б. Бикбай.

**СӘРПӘЛӘҮ** *к. диал.* Сәрпәкләү. *Сәрпәләп утын ярыу.*

**СӘРРАЖ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Күндән тегеп, эйәр-өпсөн йәки башка нәмә яһаусы.

**СӘРРАЖЛАУ** *к. иҫк.* Күн менән тышлау. *Китапты сәрражлау.*

**СӘР-СӨР, сәр ҙә сөр** *окш.* Әсе итеп нәҙек тауыш менән кыскырғанды, кыскырып һөйләшкәнде, илағанды һ. б. белдергән һүҙ. *Сәр-сөр кыскырыу. Сәр-сөр килеү.* ■ *Фәис сәпсектәрҙең .. сәр ҙә сөр килеп сыйырсыкка ташла-*

*ныуын .. күреп хайран калғайны.* В. Исхаков.

**СЭРТ** *окш.* Ус менән яланғас тәнгә еңелсә һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Сәрт итеп калыу. Сәрт иттереп һуғыу.*

**СЭРТЛЭТЕҮ** *к.* Сәрт иттереү. *Сәртләтеп һуғыу.* ■ *— Һай, корогоро! Нисәмә әйтәм, кап-ма бармағыңды тип! — Шакирә уның [улының] кулына сәртләткәнсе һукты.* З. Ураксин.

**СЭРТЛЭҮ** *к.* Сәрт итеү, сәрт иткән тауыш сығарыу. *Һуғыш мылтығының колак .. ярырлык тауышы менән сағыштырғанда куян мылтығының сәртләп атылған нәҙек тауышы Әхмәҙигә нисектер ирмәк тойолдо.* Ж. Кейекбаев.

**СЭРТ-СЭРТ** *окш.* Ҡабат-кабат сәрт иткән тауышты белдергән һүҙ. *Сәрт-сәрт итеү.*

**СЭРҮИ** [*гәр.*] *и.* **1.** Артыш япраҡлы, оҙон, төҙ олонло мәңге йәшел көньяҡ ағасы; кипарис. *Баксаларҙа сәрүи ағас, ботағында һандуғас* (Халыҡ йырынан).

**2.** *диал. кар.* **сәрүәр** [1] **1.**

**3.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

♦ **Сәрүи ҡамәт** зифа, һомғол буй.

**СЭРҮЭР** [1] *и.* **1.** Селеккә оҡшаған эре ҡыуаҡ; бохар селеге. *Сәрүәр ағасы.*

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**СЭРҮЭР** [2] [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Башлыҡ, етәксе.

**СЭРХУШ** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Иҫерек. *Ҡатын .. сигара төтөнө арҡаһында сәрхуш булып ултырған кешеләрҙе тикшерә башланы.* И. Насыри.

**СЭРХЭТ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Иркен, киң урын; ■ *Быңдай сәрхәт яланда эшләү үҙе бер дан.* К. Мәргән. *Тук буйкайҙары ла — сәрхәт ялан, әйләнәһен һары тал алған* (Халыҡ йырынан).

♦ **Сәрхәт кыяғы** ҡуйы булып үҫә торған ваҡ ҡыяҡлы үлән.

**СЭРЭТАН** [*гәр.*] *и. кит. иҫк.* Саратан.

**СЭС** [1] *и.* Кешенең башында үҫә торған мөгөҙ матдәнән ғибәрәт нәҙек кенә еп һымаҡ төк. *Аҡ сәс. Бөҙрә сәс. Ҡара сәс. Сәс алдырыу. Сәс тарау.* ■ *Ныҡ, каты тәбиғәтле кешеләрҙең сәсе бик ағарып бармай. Был бәхәс-һеҙ.* Х. Зарипов. *Убырлы карсыҡ уны еҫкәнеп килеп табып ала ла йотоп ашай. Бибиғәйшәнең ике толом сәсе генә тороп кала* (Әкиәттән). **Кикел** (*йәки* **маңлай) сәсе** аттың маңлайына төшөп торған өлтөк сәс. *Кейеҙбай .. кеҫәһенән кола аттың өс бөртөк кикел сәсен сығара, шуларҙың береһен өтөүгә кола толпар үҙе килеп тә баҫа* (Әкиәттән).

♦ **Сәс йолкоу** нимәгәлер үкенеп, үҙеңде үҙең өҙгәләү. *Ағас адвокат, бер аҙ айныйы төшөп, үҙ сәсен үҙе йолкколай: — Портфелем портфель һыңлы түгел ине, әрәм булды.* Б. Бикбай. **[Сәскә] сәс бәйләнеү** кейәүгә сығыу, өйләнешеү, бергә булыуға ҡарата әйтелә. *[Әбей:] Эйе шул, Зыя, фәрештәнең амин тигән сағына тап килеп, сәсегеҙ сәскә бәйләнеп тә куйыр әле.* М. Тажи. **[Сәскә] сәсте бәйләү** 1) кейәүгә биреүгә ҡарата әйтелә. *Минең генә сәсем бәйләнегеҙ утыҙ йәшкә оло ир менән* (Сеңләүҙән); 2) бергә тормош ҡороу, өйләнешеү. *Тимерҡаҙыҡ менән сәсте сәскә бәйләгәндән бирле ул [Зәйтүнә]* үҙен бик бәхетле итеп һанай ине. Ғ. Ибраһимов. **Сәс менән һепереү** кемдер өсөн өлтөрәп тороу, бөтә нәмәне эшләргә әҙер булыу. *Сәсем менән ер һеперермен, яланғас кулдарым менән таш ватырмын, иллә-мәгәр балаларымды кеше күҙенә ҡаратып тилмертмәм.* Я. Вәлиев. **Сәс тамыр** үҫемлектең сәс һымаҡ нәҙек кенә суҡ тамыры. **Сәс үрә тороу** бик ныҡ ҡурҡҡанды йәки шаҡ ҡатып аптырағанды белдерә. *Ботаника дәреҫе еттеме, Исмәғилдең сәсе үрә тора.* Я. Вәлиев. **Әбей сәсе** *диал.* ҡылған.

**СЭС** [2] *и. диал.* Елкә тарамышы.

**СЭСБАУ** *и. кар.* **сәсмәү.** *Мәрйенле сәсбау. Сәсбау тағыу.* ■ *Сәсбауыкайҙарын серт-серт тибеп, һыу ташыйҙыр бер кыҙ баксаға* (Халыҡ йырынан).

**СЭС-БАШ** *и. йыйн.* Сәс һәм баш. *Бакшы тиһәң, бакшы инде. Сәсе-башы туҙған, өй эсе боларып бөткән, һыуыҡ, бахырҡайҙың.* Һ. Дәүләтшина.

**СЭСЕЛДЕРЕҮ** *к.* Тирә-яҡҡа һибеү, таратыу. *Сәселдереп ебәреү.*

**СЭСЕЛЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **сәсеү** [1] 1. *Сәселгән иген.* ■ *Баҫыу тултырып сәселгән майҙандар шатландыра картты.* Б. Бикбай. *Ялан тултырып тары сәселгән* (Әкиәттән).

**2.** Түгелеп, һибелеп төрлө ергә барып төшөү, тәртипһеҙ, тырым-тыраҡай таралыу. *Бай .. иген якшы итеп йыйыламы, башактар сәселеп .. ятмаймы тип тикшереп йөрөнө.* Ғ. Дәүләтшин. *Командир?! Ах, .. тағы яраланған. Маузер ерҙә, патрон сәселгән.* Р. Ниғмәти.

**3.** Төркөм-төркөм булып йәки ерәмләп төрлө яҡҡа китеү, йүнәлеү; таралыу. *Ул сакта Билал отряды сәселеп тау башына менеп еткән [ине].* А. Таһиров. *Танкылар кинәт туктаны, пехота туғайға сәселде.* Ә. Ихсан. / Таралышып урынлашыу. *Татлыбай яғына сығып, ҡуйы урман араларына сәселгән кешеләр матур төштәр күреп йоклайҙар ине.* Ш. Шәһәр.

**4.** Тирә-яҡҡа туҙып осоу, ситкә сәсрәү; бөркөләү, һирпелеү. *Сәселә төкөрөгө тешһеҙ ауыҙҙың.* Ш. Бабич.

**5.** *күсм.* Төрлө яҡҡа йәйелеү, таралыу (яҡтылыҡҡа, нурға, еҫкә һ. б. ҡарата). *Гөлсәскәләр асылды, хуш еҫтәре сәселде.* Ш. Бабич. *Ҡояштан сәселгән кыҙыл саткылар тау биттәрен кыҙыл кан менән йыуа.* Т. Хәйбуллин.

♦ **Ризыҡ сәселеү** *кар.* **ризыҡ** 1.

**СЭСЕҮ** [1] *к.* **1.** Үҫтереү өсөн орлоҡто алдан эшкәртелгән тупраҡҡа һибеү, ултыртыу. *Арыш сәсеү. Бойҙай сәсеү. Оялап сәсеү. Сәскән ер. Сәсеү нормаһы. Сәсеү орлоғо.* ■ *Ҡарттар иген сәсергә килә. Улар тарыны күнәккә тултырып ала ла ергә һибә.* Ж. Кейекбаев. *Сәлмән .. һәйбәтләп картуф сәсеп ебәреү тураһында юлдың буйынан-буйына уйлап кайтты, ти* (Әкиәттән).

**2.** Түгеп, һибеп төрлө ергә төшөрөү, тәртипһеҙ рәүештә тырым-тыраҡай таратыу. *Һаламды ян-яҡҡа сәсеп таратып ташлау.* ■ *Токтоң ауыҙын асайык, йыуасаһын сәсәйек* (Туй йырынан).

**3.** Туҙҙырып, тирә-яҡҡа осороу, ситкә сәсрәтеү; бөркөү, һирпеү (төкөрөктө һ. б.) *Пол-*

*ковник Зенченко .. һөйләгәндә ауыҙынан күбектәр сәсте.* Д. Юлтый. *[Иблис] котора, дулай, зыҡ куба гифрит кеүек, үкерә, ауыҙынан сәсеп ҡайнар күбек.* Ш. Бабич.

**4.** *күсм.* Төрлө яҡҡа һибеү, таратыу (яҡтылыҡҡа, нурға, еҫкә һ. б. ҡарата). *Ун минут ҡына элек көлөп, нур сәсеп торған ҡояш төтөн артында ҡалды.* И. Насыри. *Ялҡын һибеп, ҡыҙыл күмер сәсеп, ут ямғыры яуа, бөркөлә.* Ш. Бабич.

**5.** Халыҡҡа билдәле итеү, таратыу. *Дандар сәсеп илгә, күпте илатып, ошомо һуң данлы егетең* (Сеңләүҙән). / Үҙенә башҡа бер хис менән ҡарау (күҙгә ҡарата). *[Ғибаҙулла:] Минең бисә булгас, ҡулына алган эше йырлап торһон, ире йәйләүҙән һағынып ҡайтҡанда, башы-күҙе дәрт сәсеп торһон!* Д. Исламов.

**6.** *күсм.* Кеше араһына таратыу, кешегә еткереү (белемгә һ. б ҡарата). *Ғилем сәсеү.* ■ *Минең табыла шатлыҡ сәгәттәрем илгә белем сәскән көнөмдә.* Ғ. Амантай. / Халыҡ араһына таратыу, кешегә һөйләү (һүҙ, хәбәргә ҡарата). *Ғәйбәт сәсеү.* ■ *[Ғаббас:] Ҡара, Тәнзилә еңгә, һинең ауыҙыңда һүҙ тормай торған. Был хаҡта теләһә кемгә сәсеп йөрөмә.* М. Тажи.

**7.** Ыуылдырыҡ һалыу, таратыу (балыҡҡа ҡарата). *Суртан ыуылдырыҡты яҙғы ташҡында сәсә.*

◆ **Ағыу сәсеү** *кар.* **ағыу** [2]. **Борсаҡ сәсеү** *шул уҡ* **борсаҡ һиптереү** (*кар.* **борсаҡ** [1]). *[Рәбиға:] Асыуланма, Тайфур: тыпырҙатырға аяҡ бар һиндә. Борсаҡ сәсергә тиһәң, тел дә ярайһы үҙеңдә.* Ш. Бикҡол. **Ғәйрәт сәсеү** *кар.* **ғәйрәт. Енен сәсеү** *кар.* **ен. Зәһәр сәсеү** *кар.* **зәһәр** 2. *Бибинур .. йор һүҙле, осҡон сәсеп торған ҡыҙ.* Б. Бикбай.

**СӘСЕҮ** [2] *и.* Нимәлер үҫтереү өсөн ергә орлоҡ һибеү, һалыуҙан торған баҫыу эше. *Тимерлектең көн-төн гөрләп торған сағы. Яҙғы сәсеүгә әҙерләнеп ятҡан көн.* М. Тажи. *Уҙган йыл, яҙ, яҙғы сәсеү мәле. .. Ер һөрөргә күрше МТС-тан контракт менән килде трактор.* Ғ. Амантай. **Сәсеү әйләнеше** бер үк баҫыуҙа төрлө игенде алмаштырып үҫтереү тәртибе. *Ете баҫыулы сәсеү әйләнеше. Өс баҫыулы сәсеү әйләнеше.* ■ *Колхозда элек туғыҙ баҫыулы сәсеү әйләнеше булган, ләкин ул һуғыш ваҡытында боҙолған.* Ә. Вәли.

**СӘСЕҮЛЕ** *с.* Иген һ. б. сәселгән. *Сәсеүле ер. Сәсеүле пар.*

**СӘСЕҮЛЕК** *и.* Иген һ. б. сәселгән ер. *Быйыл йәй буйы ямғыр яуманы, сәсеүлектәр ҡап-ҡара ер көйө ятып ҡалды.* Б. Бикбай. *Сәсеүлектәрҙән быйыл күпме уңыш алырға уйлаһығыҙ?* М. Тажи.

**СӘСЕҮСЕ** *и.* Нимәлер сәскән, сәсеү менән шөғөлләнгән кеше, төркөм. *Картуф сәсеүселәр. Сөгөлдөр сәсеүселәр. Сәсеүселәр бригадаһы. // Иген сәсеүсе хужалыҡ.* ■ *Быға тиклем ауылда игендә иң әҙ сәсеүселәрҙән һаналып килгән Ғәйни ағай ҙа, ике улын байға биреп булһа ла, ике десятинанан артығыраҡ ашлыҡ сәсеп ҡалдырҙы.* Т. Йәнәби.

**СӘСЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **сәсеү** [1] 1.

**СӘСКЕ** [1] *и. диал. кар.* **бөгәләк** 1.

**СӘСКЕ** [2] *и. диал.* Бала төш (*кар.* **төш** [2]). *Ҡояш сәске ваҡытына күтәрелгәндә, Билал отряды .. Быҙаулыҡ батальондарын ҡыуып етте.* А. Таһиров.

**СӘСКЕС** *и.* Орлоҡ һиптерә, сәсә торған машина. *Кукуруз сәскес. Тар рәтле сәскес. Үлән сәскес. Трактор сәскесе.* ■ *[Бикмәтов — Азаматовка:] Быныһы ат сәскестәре. .. Тимерлек янында күптән яталар ине. Шуларҙы көйләнек. Сәскәндә «Универсал»ға тағырға бик йәтеш буласаҡ.* Ә. Вәли. *Тос орлоҡтар сәскес тартмаһынан күпертелгән ергә ҡойла.* Ғ. Мәсғүт.

**СӘСКӘ** *и.* **1.** Үҫемлектең инәлектән һәм һеркәле матур таждан торған үрсеү ағзаһы. *Ата сәскә. Инә сәскә. Ирен сәскә. Сатыр сәскә. Тыу сәскә. Муйыл сәскәһе.* ■ *Таштуғайҡай елле туғай икән, сәскәләре ҡойола ел менән* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ошондай үрсеү ағзаһы булған, эре, матур таж япраҡлы үҫемлек. *Сәскә ултыртыу. Сәскә түтәле.* ■ *Тирмәм тора көмөш кеүек йылға ярында, хуш еҫле сәскәләр үҙә тирә ягында.* Салауат Юлаев.

**3.** *с. мәг. күсм.* Нимәләрҙер нәфислегенә, матурлығына, ғүмерҙең йәш сағына ҡарата әйтелә. *Ҡайҙа, ҡайҙа барыһы ла ҡалды икән, ҡайҙа китте сәскә йылдарым.* Н. Нәжми.

◆ **Аҡ сәскә** һары һеркәлекле, аҡ тажлы, тетмәкәй япраҡлы үлән; ромашка. **Алтын сәскә** ҡыҙғылт һары өйкөм сәскәле үлән. **Йондоҙ сәскә** эре аҡ бөҙрә сәскәле, теҙмә япраҡлы баҡса гөлө. **Күбәләк сәскәләр** сәскәләре күбәләккә оҡшаған ҡуҙаҡлылар (борсаҡ, соя һ. б.). **Күк сәскә** арыш араһында үҫкән тарбаҡай зәңгәр сәскә; зәңгәрсуҡ. **Кәзә сәскәһе** аҡ суҡ сәскәле, теҙмә йөнтәҫ япраҡлы ағыулы үлән. **Ҡыңғырау сәскә** ҡыңғырауға оҡшап торған күк, зәңгәр сәскәле үлән. **Сәскә атыу** үҫеш, матурлыҡ һәм башҡа сифаттың юғары кимәленә етеү. *Сәскә атҡан йәшлек. Әҙәбиәттең сәске атыуы.* **Ут сәскә** *диал. кар.* **һаҙ сәскәһе. Һабын сәскәһе** ҡып-ҡыҙыл өйкөм сәскәле урман, һыу буйы үләне. **Һаҙ сәскәһе** ваҡ һары сәскәле уйһыу үләне. **Ынйы сәскә** суҡланып торған ваҡ ҡына аҡ сәскәле, яҫы оҙонса япраҡлы үлән.

**СӘСКӘЛЕ** *с.* **1.** Сәскә (1 мәғ.) ата торған. *Ялан ғына ерҙең ай үләне, ат ярата сәскәле үләнен* (Халыҡ йырынан). **Ирен сәскәлеләр** сәскәһе аҫлы-өҫлө ике таж япрағынан торған үләндәр ғаиләһе (лаванда, бөтнөк, шалфей һ. б. инә). **Ҡатмарлы сәскәлеләр** ойошоп торған сәскәле, ике өлөшлө үҫемлектәр ғаиләһе (андыҙ, бәпембә, цикорий, шайтан таяғы, эрем һ. б. инә).

**2.** Сәскә (2 мәғ.) баҫҡан, сәскәгә күмелгән. *Комерсант та тыуҙыра, ижад итә. .. Тауҙар, сәхрәләр, ком сулдәре, һаҙлыҡтарҙы сәскәле баҡсаға әйләндерә.* С. Агиш.

**3.** Сәскә биҙәк төшөрөлгән. *[Атайым] баҙарҙан беҙҙең барыбыҙға сәскәле кәнфит алып ҡайтып бирә торғайны.* Т. Йәнәби. *Алһыу сәскәле, ти, күлдәге, йәшел бәрхәт камзул кейгән, ти.* К. Кинйәбулатова.

**СӘСКӘЛЕК** *и.* Сәскә (2 мәғ.) ултыртылған йәки үҫкән урын. *Бында балалар баҡсаһы булган. Алдында балалар ултыртҡан сәскәлек*

*булған.* Ғ. Ғүмәр. *Бала йүгерә, сәскәлеккә менә, гөлдәр өҙөп ала түтәлдән.* Ғ. Сәләм.

**СӘСКӘЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Сәскәлегә әйләнеү, сәскә атыу. *Иген сәскәләнгән ваҡыт.* ■ *Ҡышлау ҡынам бер ни белмәй, сәскәләнә көн һайын.* Ә. Вахитова. *Ҡул өҫтөндә тәңкә-тәңкә томбойоҡ сәскәләнә* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Гүзәл, матур булыу. *Бына бөгөн инде был урында сәскәләнә һәр көн туғанлыҡ.* Ғ. Сәләм. *Йәнле гөл һымаҡ кейенеп сәскәләнгән бер бала.* С. Ҡудаш.

**СӘСКӘЛӘҮ** *к.* Сәскә менән биҙәү. *Баш кейемен сәскәләү.*

**СӘСКӘСЕ** *и.* Сәскә үҫтереү менән шөғөлләнгән кеше.

**СӘСҠАП** *и.* Сәс толомоноң өҫтөнән кейеү өсөн оҙон тар туҡы манан иң өҫкә сытра ҡуйып ике буй тәңкә баҫып, түбәнге осона сулпы тағып яһаған биҙәүес. *Тәңкәле сәсҡап.* ■ *Әскәпьямал нурың арта сәсҡап менән, ынйы теҙгән кесерәк кенә ҡалпаҡ менән.* Ш. Бабич.

**СӘСҠЫРҒЫС** *и.* Малдың йөн төбөн ҡырып юлыта торған ҡанатһыҙ бөжәк.

**СӘСЛӘН** *и. диал.* Ҡылйылан.

**СӘСМӘ**[1] *с.* Бер урынға йыйылмаған, һибелеп торған, тарау (яҡтылыҡҡа ҡарата). *Сәсмә нурҙар.*

**СӘСМӘ**[2] *с.* Шиғыр тәртибенә килтерелмәгән, проза менән яҙылған. *Сәсмә һүҙ. Сәсмә әҫәр.* ■ *Һүҙ оҫталары — сәсәндәр иртәктең сәсмә өлөшөн әйтеп (һөйләп) бирер булған.* К. Мәргән. *Столяр дуҫ! Үпкәләмә, һиңә һүҙ тейә тип шиғри сәсмәле.* М. Кәримов.

**СӘСМӘҮ** *и.* **1.** Сәс толомона ҡушып үреү өсөн осона аҡыҡ төймә, тәңкә, суҡ тағып яһаған бау. *Сәсте сәсмәү менән үреү.* ■ *[Әбей:] Ҡуйсы, ырҡмыш тай булып йөрөүеңдә бер ҙә яратмайым. Әсәң дә бушамай, исмаһам, сәсмәү яһап бирер ине.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Мәрйен теҙелгән алты-ете буй ептән остарын суҡлап яһаған, толом төбөнә беркетеп, сәс өҫтөнән һалына торған биҙәүес. *Сәсмәү тағыу.*

**СӘСМӘҮЛӘҮ** *к.* Сәсмәү (1 мәғ.) менән үреү. *Ебәк сәскәйең сәсмәүләп, өстән үргәнһең икән.* Н. Иҙелбай.

**СӘСРӘНЛӘҮ** *к.* Бик ныҡ ярһыу. *[Нәзифә] ҡайһы бер бисәләр шикелле сәсрәнләп бармай.* Н. Мусин.

**СӘСРӘТЕҮ** *к.* **1.** Көс менән ситкә һирпеү, атылдырыу (шыйыҡлыҡты). *Бысраҡ сәсрәтеү.* ■ *Һыу сәсрәтеп мостовойҙан етеҙ автобустар уҙалар.* Ғ. Сәләм. *Күк ат башын салыҡлап, .. арҡаһындағы күбектәрен сәсрәтеп, ҡойроғон елберләтеп, Айбулат янына килеп етте.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Бөртөк-бөртөк, киҫәк-киҫәк көйө тирә-яҡҡа осороу, һибелтеү (бөртөклө нәмәне).

**3.** *күсм.* Юҡ итеү, үлтереү; дөмөктөрөү. *[Моталлап — Фәнискә:] Кил, кил. Сәсрәткәнсә йыға һуғырға уңайлыраҡ булыр. Кил.* Р. Низамов. *[Һалдаттар:] Беререн сәсрәткәндәр икән. Бик яҡшы.* М. Ғафури.

**4.** *күсм.* Хәл ҡылымдың *-а*, *-п* формаһында бик ныҡ, ҡаты итеп; ярһып. *Фәниә сәсрәтә баҫып сығып китте.* Н. Мусин. *[Һылыубикә] сәсрәтеп әбейҙе яманлай.* И. Кинйәбулатов.

♦ **Сәсрәтеп әйтеү** бик ҡаты итеп тураһын әйтеү. *[Бабай:] Бик һәйбәт егет беҙҙең начальник. .. Әйтер ерендә сәсрәткәнсе әйтә. Маҡтарлыҡ ерендә маҡтап та ебәрә, аралаш.* Ж. Кейекбаев. *Баһау .. дөрөҫлөктө сәсрәтеп әйте.* Я. Вәлиев. **Ут сәсрәтеү** 1) күҙ алдында осҡон уйнатыу, ут күрһәтеү. *Сергейҙең күҙенән ут сәсрәтеп, мейеһен ялҡын ярып үтте.* А. Абдуллин; 2) *шул уҡ* **ут сәсеү** *ҡар.* **ут**[1]. *Ут сәсеп бейеү.*

**СӘСРӘТМӘ** *и.* Балалар уйыны (әйтемләп көтөүсе билдәләнә; бер башы ҡалҡытып ҡуйылған таҡтаның түбәнге осона бер тигеҙ оҙонлоҡтағы бер нисә (20—30) сыбыҡ һанап һалына; берәү таҡтаның башына баҫып сыбыҡтарҙы тарата һәм көтөүсе ошо сыбыҡтарҙы һанап йыйған арала уйынсылар тирә-яҡҡа йәшенеп бөтөргә тейеш була, көтөүсе уларҙы эҙләп, күргән береһенең исемен ҡысҡыра бара; шул ваҡыт исеме әле ҡысҡырылмаған берәү йүгереп килеп, таҡтаны тағы тибеп китергә мөмкин, ул саҡта табылған кешеләр кире йәшенә, уйын ҡабаттан башлана, әгәр көтөүсе бөтәһен дә табып өлгөрһә, иң тәүҙә табылған кеше көтөүсе була).

**СӘСРӘҮ** *к.* **1.** Ситкә һирпелеү, көс менән атылыу (шыйыҡлыҡҡа ҡарата). *Ауыҙынан төкөрөгө сәсрәне. Ат өҫтөнән аҡ күбек сәсрәй. Крандан һыу сәсрәп тора. Табала сәсрәп май ҡайнай.* ■ *Нәҙек торбанан сәсрәп бөркөлгән пар ер ҡалтыратып тауыш сығара.* Т. Хәйбуллин. / Һирпелеп нимәгәлер килеп тейеү. *Биткә һыу сәсрәне. Ҡулдәккә бысраҡ сәсрәгән.* ■ *Юлия аҡ халатына сәсрәгән ҡан тамсылары усы менән һыпырып һөртә.* Һ. Дәүләтшина. *Хәтирәнең битенә һалҡын тамсылар сәсрәне.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Бөртөк-бөртөк, киҫәк-киҫәк хәлендә тирә-яҡҡа осоу, һибелеү (бөртөклө нәмәгә ҡарата). *Боҙ саҡҡылары ҡыуанышып, тирә-яҡҡа сәсрәне.* З. Биишева. *[Сыуашаевтың] ҡулына тотҡан стаканы стенаға барып бәрелде лә сәсрән китте.* Д. Юлтый. / Ҡапыл ысҡынып, хәрәкәт көсө менән ситкә алып ташланыу. *Ҡырандас туңҡәрелеп китте. Ҡотлобай менән офицер икеһе ике яҡҡа сәсрәп барып төштө.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *күсм.* Бик көслө булып урғылыу, тышҡа сығыу (уй-тойғо, хискә ҡарата). *Дәрт сәсрәй көслө күҙҙәренән, һүҙ сәсрәй үткер теленән.* Ғ. Мәсғүт.

**4.** *күсм.* Хәл ҡылымдың *-п* формаһында килеп бик етеҙ, ҡыҙыу хәрәкәт иткәнде белдерә; атылып. *Сәсрәп барып инеү. Сәсрәп килеп етеү.* ■ *Элвира, йылғыр кейек кеүек, сәсрәп йөрөй.* Ф. Иҫәнғолов. / Ныҡ ярһығанды белдерә. *Ҡобора уның [иренең] өҫтөнә ауған да, сәсрәп-сәсрәп илай ине.* Б. Бикбай.

**5.** *күсм.* Юҡҡа сығыу; дөмөгөү. *[Йәнтүрә:] Баштары Себергә китте. Шунда үҙҙәре лә сәсрәне булырға кәрәк.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

♦ **Сәсрәгер** эрләгәндә әйтелә. *[Хөсби:] Сәсрәгер, фермаһы фермамы ни!* Ш. Насыров. **Сәсрәп ауырыу** бик ҡаты ауырыу. *[Ҡарт:] Нисек килеп еткәнмендер, .. хәтерләмәйем. Иртәгеһенә*

*сәсрәп ауырып киттем.* С. Кулибай. **Сәсрәп тороу** бик үткер, сая булып, ярһып тороу. *Сәсрәп торған катын.* ■ *Йәмигә апай был юлы нишләптер каршы һүҙ өндәшмәне. .. Башка вакытта сәсрәп тора торғайны.* Р. Низамов. **Ут** (*йәки* **оскон) сәсрәү** 1) ут сәсрәгән һымак булыу; ут күренеү. *Колсобайҙың .. күҙенән оскондар сәсрәне.* Т. Хәйбуллин; 2) *шул ук* **ут сәсеү** *кар.* **ут** [1]. *Баҫкан еренән оскон сәсрәй.*

**СӘСТАРАШ** *и. иҫк.* Сәс алған, сәс төҙөткән урын. *Сәстарашка инеү.*

**СӘСТЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **сәсеү** [1] 1. *Иген сәстереү.*

**СӘСТӘҢКӘ** *и.* Тәңкә баҫылған, сулпылы сәсүргес. *[Кыҙ] йыуан толомдары өҫтөнән өсәр кар тәңкә теҙелгән сәстәңкә таккан.* h. Дәүләтшина.

**СӘСҮРГЕС** *и.* Сәс толомона куша үреп, остан төйнәп куя торған бау. *Сабираның сәсүргесе йәшел таҫманан булып, һәр осона көмөш тәңкәләр тағылған сулпыларҙан тора.* Ғ. Хәйри.

**СӘСҮРМЕС** *и. кар.* **сәсүргес.** *Сәсүрмес менән үреү.*

**СӘС-ҺАКАЛ** *и. йыйн.* Сәс һәм һакал. *Өлкаман бай сәс-һакалын Хажгәленән генә кырҙыра.* Ш. Насыров.

**СӘСӘ** [1] *и.* Аттың бәкәлендәге оҙон йөн. *[Ерәнсәй] нукта теҙгене аша баҫкан да, алғы аяғының сәсәһенән эләктереп алған.* С. Агиш.

● *Матур сәсә — тайҙыкы, матур бисә — байҙыкы.* Әйтем.

**СӘСӘ** [2] *и.* Һунар иткәндә, айыу тиҙ генә өңөнән килеп сыға алмаһын өсөн өң ауыҙына тыға торған ботаклы-ботаклы ағас. *«Айыу бында!» — тинем мин. «Хәҙер сәсә кыркып алам да, сәсә һалырбыҙ Айыу ҙур бит, бәлки, бер атыуҙа үлтереп тә булмаҫ».* М. Сәғитов.

**СӘСӘ** [3] *и.* Кушар-кушар итеп кыуышлап, өҫтөнә береһен кыйыклап ултыртылған көлтә өйөмө. *Әсәйем менән тиң эшләйем тип, беҙ Йәмилә менән 800-әр көлтә бәйләп ташлағанбыҙ. Сәсәгә лә үҙебеҙ ултырта барабыҙ.* К. Кинйәбулатова.

**СӘСӘК** [1] *и.* Температураны күтәреп, яндырып йә өшөтөп ауырыткандан һуң тәнгә эренле сабыркты сығара, шаҙра итә торған бик каты йоғошло ауырыу. *Сәсәк ауырыуы. Сәсәк сығыу.* ■ *Ырыҫбикә инәй атайымдың нисек сәсәк менән ауырығанын, нисек үлә-үлә тип төңөлөп бөткән ерҙән иҫән калғанын әкиәт һымак итеп һөйләй.* Ш. Янбаев. **Сәсәк инәһе** сәсәк үткәндән һуң шешеп сыккан иң ҙур сабыркты. **Сәсәк һалыу** сәсәккә каршы иммунитет барлыкка килеп, кеше сәсәк менән ауырымаһын өсөн тәнгә дарыу ебәреү. **Һыу сәсәге** тән янып, һыулы сабыркты сығып, һытылып кибә торған йоғошло ауырыу.

**СӘСӘК** [2] *и.* Кейем, каралдының сите буйлатып эшләнгән сук. *Алтын еп менән тегәбеҙ ал байрактың сәсәген* (Халык йырынан).

**СӘСӘК** [3] *и. диал.* Сәскә. *Сәсәк өҙөү.*

**СӘСӘКЛЕ** *с.* Сәсәк [2], сук куйылған; ситендә, осонда суғы булған. *Сәсәкле таҫтамал. Сәсәкле яулык.*

**СӘСӘКЛӘНЕҮ** *к.* Сәсәк [2] рәүешенә килеү, сәсәк рәүешендә булыу. *Сәсәкләнеп тороу.*

**СӘСӘКЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **сәсәкләү.** *Әскәтерҙең ситен сәсәкләтеү.*

**СӘСӘКЛӘҮ** *к.* Сәсәкле итеү, сәсәк [2] куйыу. *Сәсәкләп һуғылған таҫтамал. Шәлде сәсәкләп бәйләү.*

**СӘСӘМӘ** *и. диал.* Сәсәтмә.

**СӘСӘН** [1] **1.** *с.* Акылға бай, тапкыр һүҙле. *Сәсән кеше. Сәсән булыу.* ■ *Фәтхи һалдат төҫкә атаһына тартһа, телгә әсәләре яғына окшап, һүҙе менән йәнде иретерлек сәсән ине.* С. Агиш. *Батырмын тип кем әйтмәй — яу килгәндә йүне юк, сәсәнмен тип кем әйтмәй — дау килгәндә өнө юк!* Салауат Юлаев.

**2.** *и.* Шиғри һәләткә эйә булып, фәһемле оҫта һүҙе һәм ижады менән танылык алған кеше. *Шәп кешеләр булған сәсәндәр. Улар халыктың кайғы-шатлыктарын көйгә һалып, илгә сәскәндәр.* Б. Вәлит. *Үҙе лә һөйләй, үҙе көйләй, Ихсан сәсән кеүек ир кайҙа* (Халык йырынан). **Халык сәсәне** халыктың тел ижадын якшы белеп уны үҙ ижады менән байыткан кешегә бирелә торған мактаулы исем.

● *Сәсән күрке һүҙ булыр, мәргән күрке күҙ булыр.* Әйтем. *Сәсән барҙа телең тый, оҫта барҙа кулың тый.* Әйтем.

**СӘСӘН** [2] *с. диал.* Ярһыу. *Сәсән ат. Сәсән кеше.*

**СӘСӘНЛЕК** *и.* **1.** Һүҙгә оҫталык, һүҙгә маһирлык. *Йылкыбай, башкорттоң бөтә сәсәнлеген егеп, үҙҙәренең ни өсөн килеүҙәрен һөйләп бирергә әҙерләнә.* «Алдар менән Зөһрә».

**2.** Сәсән (2 мәғ.) ижады. *Әлекке башкорт йәмғиәтендә .. сәсәнлек бик нык үҫкән булған.* Ж. Кейекбаев. *Мөхәмәтша Буранголов бигерәк тә сәсәнлектә, халык ижады комарткыларын халыкка кире кайтарыуҙа үҙе бер маһир, үҙенсәлекле талант ине.* «Ағиҙел», 1968, № 12.

**СӘСӘНЛӘНЕҮ** *к.* Телгә оҫтарыу. *Әллә ниңә шунда тел асылып, сәсәнләнеп киттем һөйләргә.* Ғ. Амантай.

**СӘСӘНЛӘҮ** *к. диал.* Сыпранлау.

**СӘСӘТЕҮ** *к.* Тын юлына тәьҫир итеп йүткертеү, тынды быуыу, тын алдырмау. *Төтөнгә сәсәтеү. Һыуға сәсәтеү.* ■ *Ни өсөн минең бисәм менән улымды төтөнлө мунсаға бикләп, сәсәтеп тонсоктороп үлтерҙең.* Т. Хәйбуллин.

**СӘСӘТМӘ** *и.* Быуылта-быуылта йүткерткән йоғошло балалар ауырыуы.

**СӘСӘҮ** [1] *к.* **1.** Тын юлына нимәлер тәьҫир иткәндән, тын ала алмай быуылып-быуылып йүткереү. *Сәйгә сәсәү. Төкөрөккә сәсәү. Төтөнгә сәсәү.* ■ *Трофимовтың төҫө үҙгәрҙе, тын алышы кыҫылды, сәсәй башланы.* Я. Хамматов. *Әхмәҙулла бабай .. сәсәй-сәсәй тәмәкеһен һура.* Р. Низамов.

**2.** Тын етмәгән йәки тын юлы тығылғандан быуылыу. *Сәсәгән ат. Сәсәп ауыу.* ■ *[Әсәһе — Нурыяға:] Һин тағы шәп йүгерәм тип, сәсәп куй.* С. Агиш. *Бер йәш һылыу канга сәсәп ауҙы.* М. Кәрим. *Әлеукәй менән атаһының аты бер-бер артлы сәсәп йығылып тора, үҙҙәре икенселәренә, өсөнсөләренә алмашлап менеп, һаман сабалар ҙа сабалар икән, ти* (Әкиәттән).

**3.** *кусм.* Ҡеүәтһеҙләнеп хәрәкәттән туҡтау. *Тик һөжүмдәр бөтәһе лә сәсәне.* Ғ. Әмири.

**4.** *кусм.* Ни эшләргә белмәй туҙыныу, сәбәләнеү. *[Юлдыбикә:] «Ул Сураголдоң ырыуы-тамыры менән йолҡош булыуына минең ни шойҡаным бар»,— тип сәсәп ултыра, ти [Ҡолморҙа].* Т. Хәйбуллин.

**СӘСӘҮ** [2] *с. диал.* Һирәк, тарау булған. *Ҡарағайҙың сәсәү ылыҫтары араһынан тимер юл станцияһы күренә.* Ж. Кейекбаев.

**СӘТЕЛДӘҮ** *ҡ. ҡар.* **сатылдау.** *Сәтелдәп тороу.*

**СӘТЕРЙӘН** *и. ҡар.* **сәпсәү.**

**СӘТЕРЛӘК** *с. һөйл.* Күп һөйләүсән (ғәҙәттә сағыу тауышлы ҡатын-ҡыҙға ҡарата әйтелә). *[Мәстүрә:] Йышыраҡ килегеҙ, был сәтерләк бисә күп һөйләй икән, тип ҡурҡмағыҙ.* Ғ. Вәлиев.

**СӘТЕРЛӘҮ** *ҡ. һөйл.* Һис туҡтауһыҙ һөйләү (ғәҙәттә сағыу тауышлы ҡатын-ҡыҙға ҡарата әйтелә). *Люция уға [Хәйҙәргә] әйтеп бөтөрөргә ирек бирмәне, үҙе сәтерләп һөйләп алып китте.* Ф. Иҫәнғолов. *Биби бер сәтерләргә тотонһа, һис кемгә лә ауыҙ асырға ирек бирмәй инде.* Ә. Бикчәнтәев.

**СӘТЕР-СӨТӨР** *оҡш.* Нәҙек тауыш менән туҡтауһыҙ һөйләгән тауышты белдергән һүҙ. *Сәтер-сөтөр итеү. Сәтер-сөтөр килеү. Сәтер-сөтөр һөйләү.*

**СӘТЕХ** *[ғәр.] и. иҫк. кит.* Яҫылыҡ, йөҙ. *Тыштың бер яҡ сәтехенә соҡоп, башына бүрек кейҙерелгән ҙур бер ҡырғыҙ һүрәте рәсем ителгән.* Ғ. Рафиҡи.

◆ **Диңгеҙ сәтхе** диңгеҙ кимәле. *Агиҙелдең аръяғында тупраҡ насар, диңгеҙ сәтхенән юғары.* Ғ. Ғисмәти.

**СӘТЛӘҮЕК** *и.* **1.** Емеше майға бай булған ҡаты ҡабыҡлы бик эре йылы яҡ ағастарының (грек сәтләүеге һ. б.) дөйөм атамаһы. *Сәтләүек ағасы. Миндаль сәтләүеге.* / Шул ағастарҙың ҡаты ҡабыҡлы майға бай емеше. *«Мә, сәтләүек яра тор»,— тип ҡеҫәнән усты тултырып алып [Зөләйхаға] сәтләүек бирҙем.* Т. Йәнәби.

**2.** (*йәки* **урман сәтләүеге**) Бармаҡ башынан ваҡыраҡ ҡаты ҡабыҡлы емеш бирә торған көрәнһыу ҡабыҡлы ҡырағай ағас. *Сәтләүек ағасы.* / Шул ағастың ҡаты ҡабыҡлы майға бай емеше. *Бер ваҡыт, көҙ көнө, мин ғәҙәтемсә урманға сәтләүек йыйырға барҙым.* А. Карнай.

◆ **Аҡ сәтләүек** аҡһыл һары ваҡ сәскә атҡан, һутлы емеш биргән йылы яҡ ағасы. **Имән сәтләүеге** имән орлоғо. *Дүртөйлө колхоздарының ҡайһы берҙәрендә сусҡаларҙы имән сәтләүеге менән аҫырайҙар.* М. Хисмәтов. **Ҡытай сәтләүеге** *ҡар.* **арахис. Манжур сәтләүеге** төп-төҙ олонло, ҡаты, ҡалын ҡабыҡлы, орлоғо бик майлы көнсығыш ағасы. **Һыу сәтләүеге** һыуҙа йөҙөп үҫкән бер йыллыҡ сөсө һыу үләне.

**СӘТЛӘҮЕКЛЕК** *и.* Сәтләүек үҫкән урын.

**СӘТРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Шаршау. *Ниндәй пәрҙә, ниндәй сәтрә күҙҙәремде ҡапланы?* Ш. Бабич.

□ **Сәтрә итеү** ҡаплау, йәшереү. *[Инглиздәр] золомдарын туптар менән сәтрә итеп, беҙҙәргә күренәләр яҡшы атлы.* М. Ғафури.

**СӘТӘКӘЙ** *и. диал.* Сыңғарсай.

**СӘТӘШ** *и. диал. ҡар.* **йәтәс** 1, 2. *Сәтәш айырыу.*

**СӘҮЕК** *и.* **1.** Ҙур булып үҫмәй торған бәләкәй тоҡомло эт. *Ҡашҡар, үҫеп еткәс, йәмһеҙ, йөнтәҫ сәүеккә әйләнде лә ҡуйҙы.* З. Хисмәтуллин. *Мин эт затының .. ҡарпыш ҡолаҡлыһын да, бурҙайын да, төлкө тота торған .. тазығын да, тынғыһыҙ сәүеген дә күргәнем бар ине.* С. Кулибай.

**2.** *кусм.* Гел ерләшеп, абалап торған кешегә ҡарата әйтелә.

● *Сәүек эт ҡартайғанса көсөк.* Әйтем.

**СӘҮЕР** [*ғәр.*] *и.* **1.** (*баш хәреф менән*) *астр. иҫк.* Ун ике бөрөждөң бере (Хәмәл менән Жәүзә уртаһында урынлашҡан).

**2.** Ҡояш календары буйынса икенсе айҙың ғәрәпсә исеме (22 апрель — 21 май).

● *Сәүер килмәй яҙ булмаҫ.* Әйтем.

**СӘҮКЕЛДӘҮ** *ҡ.* **1.** Сәүк-сәүк итеү, сәүк-сәүк килеү. *Сәүкә сәүкелдәһә, ямғыр яуа.* Һынамыш.

**2.** *диал. ҡар.* **сәңкелдәү** 1. *Эт кеүек сәүкелдәп, егет эргәһенән бер төлкө үтеп киткән* (Әкиәттән).

**СӘҮК-СӘҮК** *оҡш.* Сәүкә ҡысҡырған йәки бәләкәй эт, көсөк өргән тауышты белдергән һүҙ. *Сәүк-сәүк итеү. Сәүк-сәүк килеү.*

**СӘҮКӘ** *и.* Ҡоҙғондар ғаиләһенә ҡараған буҙ башлы, ҡара кәүҙәле ҡош. *Сәүкә йоморҡаһы. Сәүкә ояһы.* ■ *Яҙғы тынлыҡ моңон сәүкә тауышы ғына боҙа.* Ғ. Хәйри. *Мәсет ҡыйығы өҫтөнән һуңға ҡалған бер төркөм сәүкә шым ғына осоп үтте.* А. Абдуллин.

◆ **Ҡара сәүкә кеүек** бик күп булып (халыҡ төркөмөнә ҡарата). *Абдрахман ҡара сәүкә кеүек ябырылып килгән дошман яуына атырға керешкән.* Ә. Вахитов.

**СӘҮМЕГЕҮ** (сәүмек≠) *ҡ. диал.* Сөйлөгөү. *Сәүмегеп барып төштө.*

**СӘҮМӘЛЙЕҮ** *ҡ. диал.* Иңҡәнләү. *Сәүмәлйеп атлау. Сәүмәлйеп еләк йыйыу. Сәүмәлйеп эшләү.*

**СӘҮСӘЛӘК** *с. диал.* Кәүгәсел. *Операцияны баш врач үҙе яһаны. Дүрт сәғәт ярым. .. Арттырмайым, башҡа берәй сәүсәләк, түҙемһеҙ кеше булһа, терелә алмай ине.* И. Абдуллин.

**СӘҮСӘЛӘНЕҮ** *ҡ. диал.* Биҙаланыу. *Сәүсәләнеп илау.*

**СӘФАҺӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Оятһыҙлыҡ, боҙоҡлоҡ. *Һибәт күп аҡсаһын сәфаһәт юлына сарыф ҡылырға ҡыҙғанмаһа ла, дин вә милләт юлына бер тин биреүҙе аяй ине.* А. Таһиров. *Сәфаһәт менән ысын ғишыҡ бер кәлбтә түгел.* Ә. Иҫәнбирҙин. **Сәфаһәт ғәләме** боҙоҡлоҡ эше, насарлыҡ юлы. *Таһирьян хәлфә йәш ваҡыттарында сәфаһәт ғәләмендә бул[һа ла], һуңғы йылдарҙа суфыйлыҡ күрһәтеп, ул эштәрҙе күмде.* З. Һаҙый.

**СӘФИЛ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Түбән, насар (кешегә ҡарата). *Ни файҙа көс һынатмаҡ бер сәфилдән, еңелһә-еңһә берҙер ғәрһеҙ иргә.* Б. Мирзанов.

**СӘФӘЛӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Түбәнлек, насарлыҡ. *Сәғәҙәткә ирешкәс, сәфәләткә бирелмә.* Ш. Бабич.

**СӘФӘР** [1] [*гәр.*] *и.* Алыҫ юл, сәйәхәт. *Сәфәр кешеһе. Сәфәргә китеү. Сәфәрҙән ҡайтыу. Хәйерле сәфәр теләү.* ■ *Шунда уҡ сәфәр ярағын күреп, .. вокзалға төшөп киттек.* Ш. Хоҙайбирҙин. *Ул [егет] өс юлдаш алып, мылтыҡ аҫып, сәфәргә сығып китте, ти.* (Әкиәттән). **Сәфәр йөрөү** сәйәхәттә, юлда булыу. **Сәфәр сығыу** алыҫ юлға, сәйәхәткә сығыу. *Оҙон да ғына юлға сәфәр сыҡтым, күреп тә булмаҫ, йәнем, хуш-һау бул* (Халыҡ йырынан).

□ **Сәфәр ҡылыу** юл йөрөү, сәйәхәт итеү. *Сит илдәргә сәфәр ҡылыр булһаң, бил ҡайыш-ҡайҙарың ҡыҫып быу* (Халыҡ йырынан).

**СӘФӘР** [2] [*гәр.*] *и.* **1.** Ай календарының икенсе айы (*ҡар.* **календарь**). *Сәфәр айы — хәтәр ай, кеше ул айҙа юлға сыҡмай, ҡыҙ оҙатмай.* Һынамыш.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**СӘФӘРЛӘНЕҮ** *ҡ.* Алыҫ юлға әҙерләнеү, юлға сығыу. *Йыраҡ ҡына юлға сәфәрләндем, дуҫ-иштәрем торһон доғала* (Халыҡ йырынан).

**СӘХИФӘ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Китап, газета, журнал бите; ҡағыҙ бите. *Ғәлиев .. ниндәйҙер газета сәхифәләренә күҙ йүгертте.* А. Таһиров. *Ул китаптың һәр сәхифәһенә игтибарлы мотәләгә итә.* Аҡмулла. / Газета, журналдың айырым бер эш-тормош тармағына бағышланған бите. [*Мәфрузә:*] *«Совет Башҡортостаны» газетаһында .. әллә ҡасандан бирле ҡатын-ҡыҙ өсөн сығарылып килгән сәхифәне бөгөн шулай [«Урал ҡыҙы» тип] атағандар.* С. Агиш. *Ике комсомол газетаһында әҙәбиәт сәхифәһе бар.* Д. Юлтый.

**2.** *күсм.* Тормошта эҙ ҡалдырған осор йәки ваҡиға. *Тарих сәхифәләре. Онотолған сәхифәләр. Күңел сәхифәләре.* ■ *Каруанһарай — башҡорт хеҙмәтсән халҡының азатлыҡ һәм бойондороҡһоҙлоҡ өсөн алып барған күп быуатлыҡ көрәш тарихына кескәй бер сәхифә булып ингән йорт.* З. Биишева. *Аҙым һайын маҡтаулы тарихтың яңы сәхифәһе асыла.* Т. Йәнәби.

**СӘХЛӘП** [*гәр.*] *и.* Болонда, туғайҙа үҫә торған ҡуш бүлбеле, һыңар һабаҡлы, һабаҡ төбөндә урынлашҡан ҡуш япраҡлы, аҡ ирен сәскәле үлән; әшәлсә.

**СӘХНӘ** [*гәр.*] *и.* Тамаша өсөн махсус эшләнгән бейек урын. *Сәхнә арты. Сәхнәгә сығыу. Сәхнәнән төшөү.* ■ *Тимер мәктәп сәхнәһендә репетиция яһай икән.* Б. Бикбай. *Хафиз ҡарт сәхнәгә уҡ менеп баҫты.* М. Тажи. / Театр һәм ғөмүмән тамаша сәнғәте. *Сәхнә оҫтаһы. Сәхнә әҫәре. Профессиональ сәхнә. Сәхнәгә килеү.* ■ *Эй, ҡасан һуң сәхнәбеҙҙә шыңғырар моң, саф ауаз.* Ш. Бабич. *[Арслан Мөбәрәков] бөйөк Лениндың сәхнә образын тыуҙырҙы.* Ғ. Әхмәтшин.

**СӘХНӘЛӘШТЕРЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **сәхнәләштереү.** *Ауыл клубтары өсөн сәхнәләштерелгән новелла.*

**СӘХНӘЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Спектакль итеп сәхнәгә ҡуйыу. *Пьесаны сәхнәләштереү.* ■ *Башҡорт драматургы Ҡадир Даяндың «Таңсулпан» драмаһын Ватан һуғышы йылдарында уҡ Сәхи Сәитов сәхнәләштергәйне.* Ғ. Әхмәтшин. *Күптән түгел театр Ә. Мирзаһитовтың «Әсәйемдең сал сәстәре» драмаһын сәхнәләштерҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1980, 3 август.

**2.** Сәхнә әҫәренә әйләндереп, сәхнәгә ҡуйыу. *Романды сәхнәләштереү.*

**СӘХРӘ** [*гәр.*] *и.* **1.** Йәйрәп ятҡан киң дала. *Аҡ ҡарҙарҙы кимереп, ҡанат һелкеп, сәхрәләрҙә яҙғы ел иҫә.* Ғ. Мәсғүт.

**2.** Тәбиғәттең йәмле, матур урыны. *Сәхрәгә саҡырыу. Сәхрәгә сығыу. // Сәхрә ҡырҙар.* ■ [*Рәхимә:*] *Ҡана, бер һәйбәтләп, сәхрәлә иркенләп сәй эсеп алайыҡ әле.* Һ. Дәүләтшина. *Кем яратмай һуң ул сәхрә йәйҙе!* Ж. Кейекбаев. **Сәхрә сигеү** сәхрәлә рәхәтләнеп ял итеү. [*Ғәлимә:*] *Мин уны ҡасандан бирле эҙләп йөрөйөм. Урман ҡалманы, ҡыр ҡалманы.., ә ул бында сәхрә сигеп ултыра.* Х. Ибраһимов.

**СӘХРӘЛӘҮ** *ҡ.* Сәхрәгә сығып ял итеү. *Ырымбур генерал губернаторы Перовский [утарҙа] шифалы бал ашап, сихәтле ҡымыҙ эсеп, сәхрәләп ята торған булған.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1968, № 8.

**СӘХРӘҮИ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Далаға, сәхрәгә мөнәсәбәтле; сәхрәләге. *Сәхрәүи халыҡ.*

**2.** *күсм.* Культураһыҙ, ҡырағай.

**СӘХТИӘН** [*фарс.*] *и. иҫк.* Сафьян. *Ҡуҙыйкүрпәс тирмәгә инһә — сәхтиән мендәр өҫтөндә Мәскәй ултыра.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**СӘХӘБӘ** [*гәр.*] *и.* Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең замандашы һәм көрәштәше булған кеше. [*Әпкәләй:*] *Беҙҙең ата-олатайҙарҙың тайраһы Әбүбәкер Ситдиҡ сәхәбәгә барып тоташа. [Улар] боронҙан ҵзге булып килгән.* Д. Юлтый.

**СӘХӘР** [*гәр.*] *и.* **1.** Таң алды, таң атыр саҡ. *Башҡорт һүҙе, башҡортомдоң моңо ҡолағыңа тик бер салыныр. Бер салыныр ... Сәхәр ваҡытында шул моңдарҙы күңел һағыныр — ҡолағыңа тик бер салыныр.* М. Кәрим.

**2.** Ураҙа тотҡан мосолмандың таң алдындағы ашы. *Сәхәр эсеү.* ■ *Сәхәр булған саҡтарҙа һәр бер йортта ут булыр* (Бәйеттән).

**СӘХӘҮЕҘ** [*рус.* цейхгауз ⟨*нем.*] *и. һөйл.* Ҡорал һәм хәрби кейем һаҡлай торған бина. *Аждаһа батшаның сәхәүеҙҙәрен онтай һуғып йөрөй, ти* (Әкиәттән).

**СЮЖЕТ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Художестволы әҫәрҙең йөкмәткеһен тәшкил иткән үҙ-ара бәйле һәм эҙмә-эҙлекле ваҡиғалар. *Сюжет ебе. Сюжет үҫеше. Сюжет төҙөү.* ■ *Күпселек лирик шиғырҙарҙың сюжет йүнәлеше шундайыраҡ: егет менән ҡыҙ бер-береһен ярата, ләкин был хаҡта икеһенең береһе башлап һүҙ әйтергә ҡыймай.* Р. Ниғмәти.

**2.** Һынлы сәнғәттә һүрәтләнгән, сағылдырылған нәмә. *Һарауыстарҙағы ҡапма-ҡаршы баҫҡан ике ҡош сюжеты .. ҙур иғтибарға лайыҡ.* Н. Бикбулатов.

**СЮЖЕТЛЫ** *с.* Ниндәйҙер сюжетҡа ҡоролған. *Сюжетлы фильм. Сюжетлы поэма.* ■ *Ҡумәк бейеүҙәр араһында иң һоҡландырғаны .. «Егеттәр һәм ҡыҙҙар» бейеүе менән «Совет власы өсөн» тигән сюжетлы бейеү булды.* Н. Иҙелбай.

**СЮИТА** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Бер нисә үҙ аллы өлөштән тороп, дөйөм фекер йәки йөкмәтке

нигеҙендә берләшкән музыкаль әҫәр. *Симфоник сюита. Скрипка сюитаһы. Фортепиано сюитаһы.* / Бер нисә бейеү номерынан торған балет циклы. *Балет сюитаһы.*

# Т

Т [тә] Башҡорт алфавитының егерме алтынсы хәрефе.

ТА [тә][1] *терк. ҡар.* ла[1].

ТА [тә][2] *киҫ. ҡар.* ла[2].

◆ ТА баһа (тә баһа) *ҡар.* **баһа**[2].

**ТАБА**[1] *и.* Аҙыҡты утта ҡурыу, мейескә ултыртып бешереү өсөн ҡулланылған түңәрәк яҫы һауыт. *Суйын таба. Сөм таба. Тотҡалы таба. Табала ҡурыу.* **Таба икмәге** (*йәки* **күмәсе**) *ҡар.* **тәбикмәк. Таба тотҡос** таба тота торған ырғаҡ башлы ҡорал. **Таба һөрткөс** таба майлау өсөн тотолған сепрәк. / Шул һауыт менән билдәләнгән үлсәү самаһы. *Бер таба ҡурмас. Ике таба ҡоймаҡ. Оло бер таба картуф.* ■ *Айбулат .. бер таба сөсө икмәк алып китте.* Һ. Дәүләтшина.

● *Ҡоймаҡ тәмле тип, табаны ялап булмай.* Әйтем.

**ТАБА**[2] *и. диал. ҡар.* **табаҡ**[3].

**ТАБА**[3] *бәйл. диал. ҡар.* **табан**[3]. *Кискә таба. Үргә таба.*

**ТАБАҒАС** *и.* Таба тотоу өсөн ҡулланылған ырғаҡ башлы, оҙон һаплы ҡорал.

**ТАБАҠ**[1] *и.* **1.** Аш-һыу өсөн ҡулланылған киң ауыҙлы ҙур сөм һауыт. *Ағас табаҡ. Тимер табаҡ. Аш табағы.* ■ *Батша кеше менән бер табаҡтан ашарға, бер күрәгәнән ҡымыҙ эсергә ерәнә, ти* (Әкиәттән). / Шул һауыт менән билдәләнгән үлсәү самаһы. *Бер табаҡ ит. Оло табаҡ һурпа.* ■ *Барсаһы бар: кишер, карбуз, ҡабаҡ, көн һайын тораһың алып бөтмәҫ ҡыярҙы йөҙ табаҡ.* Ш. Бабич. *Ташйөрәк бер ашағанда бер табаҡ бал, бер табаҡ май, бер мейес икмәк ашап бөтә, ти* (Әкиәттән).

**2.** *диал.* Таштабаҡ.

◆ **Ашаған табаҡҡа төкөрөү** яҡшылыҡ күрһәткән кеше йәки нәмәгә яманлыҡ ҡылыу. *Колхозды яманлап, ашаған табағыңа төкөрөп торма.* М. Тажи. **Табаҡ бит** *ҡар.* **бит**[1] 1.

**ТАБАҠ**[2] *и.* **1.** Ҡағыҙ, ҡалай кеүек йоҡа нәмәнең дүрткел итеп ҡырҡылған ҙур бер киҫәге. *Ҡағыҙ табағы. // Бер табаҡ ҡалай. Табаҡ-табаҡ ҡатырға.* ■ *Табаҡ та ғына табаҡ ай аҡ ҡағыҙ Бөрйәнбайҙың яҙған хаттары* (Халыҡ йырынан).

**2.** *полигр.* Баҫма эйберҙе, китапты үлсәү берәмеге. **Автор табағы** авторға тейешле гонорарҙың күләмен билдәләү өсөн алынған берәмек (40000 тамға). **Баҫма табаҡ** баҫма эйберҙең күләмен билдәләү өсөн берәмек итеп алынған билдәле бер үлсәмдәге ҡағыҙ.

**ТАБАҠ**[3]: **ырҙын табағы** ырҙындың ашлыҡ һуғыу өсөн таҡырлап эшләнгән майҙаны. *Япмалы ырҙын табағы.* ■ *Ашлыҡ бешеп килгән мәл .. Ҡатын-ҡыҙ ырҙын табағы таҙарта, иген киләттәре әҙерләй.* Т. Килмөхәмәтов.

**ТАБАҠЛАУ**[1] *ҡ.* Табаҡҡа[1] бүлеү, табаҡҡа һалыу. *Табаҡлап ташыу.*

● *Ҡалаҡлап йыйғанды табаҡлап түкмә.* Әйтем.

**ТАБАҠЛАУ**[2] *ҡ.* **1.** Табаҡҡа[2] бүлеү, табаҡ рәүешенә килтереү. *Ҡағыҙҙы табаҡлап ҡырҡыу.*

**2.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында табаҡ[2] һаны менән, табаҡ менән иҫәпләп, тигән мәғәнәне аңлата. *Ҡалайҙы табаҡлап һатыу.*

**ТАБАҠЛЫ** *с.* Табаҡ[2] (1 мәғ.) рәүешендәге. *Табаҡлы ҡағыҙ. Табаҡлы ҡалай. Табаҡлы тимер.* ■ *Әҙәм бейеклеге оҙон-оҙон быяла ҡыуыҡтары теҙелә тора, шунан улар, ялҡын үтә .. уҙып, табаҡлы быяла хәленә инә.* Ж. Кейекбаев.

**ТАБАҠСА** *и. диал.* Ҡул тирмәненең аҫты, аҫҡы өлөшө.

**ТАБАҠТАШ** *и. һөйл.* Табындаш.

**ТАБАҠ-ҺАУЫТ** *и. йыйн.* Аш-һыу өсөн тотонған төрлө һауыт; һауыт-һаба. *Шәхми ҡарт шунда уҡ табаҡ-һауытты йыя һалды.* Т. Йәнәби.

◆ **Табаҡ-һауыт шылтырамай тормай** (*йәки* **булмай**) *шул уҡ* **ҡашығаяҡ шалтырамай тормай** (*ҡар.* **ҡашығаяҡ**).

**ТАБАЛАНЫУ** *ҡ.* Күп йөрөүҙән ергә баҫҡыһыҙ булып ауыртыу (аяҡ табанына ҡарата).

**ТАБАЛАУ** *ҡ.* Ғәйепләп, яла яғып әҙәрләү, ҡыйырһытыу. *Табалай ҙа дошман, әй табалай, дуҫ-иштәрем мине аралай* (Халыҡ йырынан).

**ТАБАЛДЫРЫҠ** *и.* **1.** Машина, эш ҡоралын эшләтеү өсөн аяҡ менән баҫа торған ҡулайлама. *Аяҡ орсоғоноң табалдырығы. Теген машинаһының табалдырығы. Киндер ыҫтанының табалдырығы. Табалдырыҡ ебе.*

**2.** Аяҡты ҡуя, аяҡ менән баҫып тора торған ҡулайлама. *Бәүелсәк табалдырығы. Өҙәнге табалдырығы. Солоҡ табалдырығы.* ■ *Табалдырығына шариклы подшипник ҡуйып, .. үҙе эшләгән был нәмәне Ҡыҙрас «самокат» тип йөрөтә* З. Биишева.

**ТАБАН**[1] *и.* **1.** (*йәки* **аяҡ табаны**) Аяҡтың баҫа торған аҫҡы яғы. *Табан аҫты. Табан һөйәктәре.* ■ *Итек ҡыҫа, ауыр. Ялан аяҡ ҡына барыр ине, юлға түшәлгән ваҡ ҡырсын табанды телә.* Б. Бикбай. *Айыу ҙа әллә ҡасан ҡышҡы йоҡоға талған, табанының майын һурып .. ята.* Ғ. Дәүләтшин. **Таш табан** ялан аяҡ йөрөп, ҡатып бөткән табан. *Бер яғында йырлап ер тырмата таш табанлы ҡара малайҙар.* Б. Вәлит. **Яҫы табан** биле баҫылып, төшөп торған ләпәк табан.

**2.** Аяҡ кейеменең аҫҡы өлөшө. *Бейма табаны. Итек табаны. Табан һалыу.* ■ *Башҡаса мин табан туҙҙырып, мәғәнәһеҙгә йөрөйәсәк түгел мен.* Х. Ғиләжев.

**3.** Сана йәки бүтән нәмәнең шыуып бара торған аҫҡы шыма өлөшө. *Сана табаны. Табанлы тырма.* ■ *Кашауайҙың тимерле табаны бер көйгә генә һыҙғыра.* Д. Исламов. *Ниместәрҙең санаһы, бөгөлмәгән табаны* (Бәйеттән).

**4.** *һөйл.* Икмәктең аҫҡы яғы. *Мейес һүрәт булып, икмәктең табаны килмәгән.*

◆ **Бер табандан** бергәләшеп, бер булып; бер төптән. *Бер табандан тороп күрәшеү. Бер табандан эшләү.* ■ *Ҡатил серен бирмәгән, бер табандан уҡтал, тип, дүрт батырға ымлаған* «Урал батыр». **Йөн табан** шым ғына йөрөгән

шикле кешегә ҡарата әйтелә. **Табан аҫты** кеше баҫҡан ер; аяҡ аҫты. *Быҫраҡ табан аҫтында башҡорт намыҫы ятмаҫ.* Ш. Бабич. **Күк табан** яҙ миҙгеленең сана юлын иретеп, туңдырып торған тәүге осоро. **Сүп** (*йәки* **тиреҫ**) **табан** аяҡ аҫты иреп, ҡарайып ятҡан мәл. **Һыу табан** аяҡ аҫты ныҡ ирегән, һыу йәйелеп ятҡан мәл. *Көн оҙонлоғо ун бер сәғәт булһа, күк табан, тиҙәр. Ҡар ирей башлай. Ун икелә — сүп табан, ун өстә — һыу табан, ун дүрттә — атың ек тә, һөр һабан.* Ғ. Ибраһимов. **Табан ергә теймәү** *шул уҡ* **аяҡ ергә теймәү** (*ҡар.* **аяҡ** [1]). **Табан яҙҙырмай** бер аҙым да ҡалмай; әҙ яҙлыҡтырмай. *Йәрмәттең иптәше ҡасып китмәһен өсөн, Әптерәй уның артынан табан яҙҙырмай барырға кәңәш итә.* (Хикәйәттән). **Табан ялтыратыу** әйләнеп тә ҡарамай, ҡасыу.

● *Февраль — күк табан, март — тиреҫ табан.* Әйтем.

**ТАБАН** [2] *и.*, **табан балыҡ** Сазандар ғаиләһенә ҡараған һары тәңкәле, ҡыҙғылт ҡанатлы, яҫы, ялпаҡ кәүҙәле күл балығы. *Ҡара табан. Һары табан.* ■ *[Ҡотош:] Балыҡ ул тәрән, саф һыуҙы ярата. Табан балыҡҡа ғына ниндәй һыу булһа ла ярай.* Р. Ниғмәти.

**ТАБАН** [3] *бәйл.* (*төбәү клш. менән*) **1.** Эш-хәрәкәттең йүнәлешен белдерә; ҡарай. *Аҫҡа табан. Тауға табан. Урманға табан. Уңға табан.* ■ *Көн дә кис менән мин баҡсаға табан үтәмен.* Ғ. Хәйри.

**2.** Эш-хәрәкәттең билдәле бер ваҡытҡа яҡын булғанын белдерә; ҡарай. *Иртәнгә табан. Кискә табан. Яҙға табан.* ■ *Таңға табан немецтар атыуҙан туҡтаны.* Д. Юлтый.

**ТАБАНЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **табанлау** [1]. *Быйма табанлатыу. Сана табанлатыу.*

**ТАБАНЛАУ** [1] *ҡ.* **1.** Аяҡ кейеменә табан һалып тегеү. *Быйма табанлау. Итек табанлау.*

**2.** Табан ҡуйыу (санаға). *Сананы табанлау.*

**ТАБАНЛАУ** [2] *ҡ. һөйл.* Йәйәү атлау. *Табанлап килеү.* ■ *Ҡыйғы юлдары, табанлап үткән Ҡыйғы һуҡмаҡтары тәрән эҙ ҡалдырған шул.* Р. Низамов.

**ТАБАНЛАУ** [3] *ҡ. һөйл.* Олоғайыуға табан барыу, оло йәшкә яҡынлау. *[Тимерғәле — Үмәргә:] Йәшең алтмышҡа табанлағанда, аҡылһыҙ йәштәр һүҙен һөйләйһең.* Һ. Дәүләтшина.

**ТАБАНЛАШЫУ** [1] *ҡ. урт. арҙамл. ҡар.* **табанлау** [1]. *Быйма табанлашыу. Сана табанлашыу.*

**ТАБАНЛАШЫУ** [2] *ҡ. диал. ҡар.* **ныҡышыу** 1, 2.

**ТАБАНЛЫ** *с. диал.* Ныҡымыш.

**ТАБАНСА** *и.* **1.** Самауыр аҫтына ҡуя торған бәләкәй батмус. *Самауырҙы табансаға ултыртыу.*

**2.** *диал. ҡар.* **табалдырыҡ** 1.

**3.** *диал. ҡар.* **олтан** 1.

**ТАБАНСАЛАУ** *ҡ. диал.* Олтан һалып ямау, төпләү.

**ТАБАНТЫН** *бәйл. диал. ҡар.* **табан** [3]. *Ауылға табантын.*

**ТАБАТАЙ** *и. диал.* Сырлама.

**ТАБАҺА** (тәбаһа) *киҫ. шул уҡ* **та баһа** (*ҡар.* **баһа** [2]).

**ТАБҒЫ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ниҙәңдер ташҡа баҫылыуы; баҫма.

□ **Табғы итеү** ташҡа баҫыу, баҫып сығарыу. *Китапты табғы итеү.*

**ТАБҒЫХАНА** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Баҫмахана, типография.

**ТАБЕЛСЕ** *и.* Кешенең эшкә йөрөшөн табель буйынса иҫәпкә алған хеҙмәткәр. *Табелсе булып эшләү.* ■ *Ишектән инеп барғанда уны табелсе туҡтатты.— Әй, Ғүмәров, туҡта, хәҙер эшкә инергә ярамай.* Х. Мохтар.

**ТА́БЕЛЬ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Ниҙәңдер төрлө мәғлүмәт биреп төҙөлгән исемлеге. *Колхоздағы машиналар табеле. Йорт йыһаздырының табеле.* / Уҡыусының өлгәше яҙылған ҡағыҙ. *Балаларҙың дәрестә алған билдәһе коридорҙа элеүле торған өлгәш табеленә көн һайын яҙып барыла.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1965, № 1.

**2.** Эшсе-хеҙмәткәрҙәрҙең эшкә килгән-киткәнен иҫәпкә ала торған кенәгә. *Табель тултырыу. Табелгә яҙыу.* **Табель таҡтаһы** эшкә килгән-киткәндә жетон элә торған таҡта. *[Мастерскойҙа] эшкә килгән-киткәнде барларға мөмкинлек бирә торған табель таҡтаһы булырға тейеш ине.* Ә. Вәли.

◆ **Табель-календарь** графаларына йылдың ай, аҙна һәм көндәре тәртип менән яҙылған ҡағыҙ, таблица.

**ТА́БЕЛЬЩИК** [*рус.*] *и. ҡар.* **табелсе.**

**ТАБИБ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **табип.**

**ТАБИБИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Дауаға, дауалауға мөнәсәбәтле. *Ҡаты табиби режимда йәшәү.*

**ТАБИҒ** [*ғәр.*] *с иҫк. кит.* **1.** Эйәреп барған, эйәрсен. *[Ҡамай:] Ҡонҡас көйөнә йырлай ул, Килмәк табиғы бит.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Буйһоноулы, бойондороҡло. *Был дәүерҙә Башҡортостандың мәркәз идараһы Өфө губернаһына табиғ Стәрле ҡалаһында ине.* Ғ. Ғисмәти.

□ **Табиғ булыу** буйһоноу. *Россияға табиғ булыуҙан элек башҡорттар барсаһы олуғ ханға табиғ булған ваҡ-ваҡ бейҙәр вә хандар тарафынан идара улынмыш.* М. Һаҙыев.

**ТАБИҒИН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Эйәреүсе кеше.

**2.** Сәхәбәләрҙе күргән кеше. *Табиғин вә тәбғат — барса өммәт халилә.* М. Өмөтбаев.

**ТАБИКМӘК** *и. ҡар.* **тәбикмәк.**

**ТАБИЛ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Һуғып уйнамалы. *Ғәскәри бай туйға әҙерләнә башланы. Буҙ шараптар, табил барабандар.., скрипка-гармундар, балалайка-ҡурайҙар әҙерләне, ти* (Әкиәттән).

**ТАБИП** [*ғәр.*] *иҫк.* Дауасы, врач. *Табип булыу.* ■ *Йыш күренгән ул табипҡа, хәстәләп иртә-кисен.* Д. Юлтый.

● *Ас икмәккә, ауырыу табипҡа мохтаж.* Әйтем.

**ТАБИПСЫ** *и. ҡар.* **табип.**

**ТАБЛЕ́ТКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Төймә, һәҙәп рәүешендәге дарыу. *Таблетка эсеү.* ■ *[Врач] ауырыуға бер таблетка ҡаптыра һалды.* Б. Бикбай.

**ТАБЛИ́ЦА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Төрлө һан һәм мәғлүмәттәрҙең билдәле бер тәртип менән бирелгән теҙмәһе. *Турнир таблицаһы. Ҡабатлау таблицаһы. Отош таблицаһы. Статистик таблица.*

**ТАБЛО́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. махс.* Күҙәткән объекттың эшен йәки рекламаға, спорт ярыштарына һ. б. бәйле мәғлүмәттәрҙе күрһәтә торған такта, экран. *Таблога төшкән һандар.* ▪ *Кискеһен хоккей майҙансығы яктыртыла. Информацион табло уйын вакытын, иҫәпте күрһәтеп тора.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 4 декабрь.

**ТА́БОР** [*рус.*] *и. кар.* **табыр.** *[Кәюм ағай] таборҙа аш бешерә. Һәр агрегатка йөрөтөп, кешеләрҙе ашатып сыға.* Р. Солтангәрәев.

**ТАБУ́** [*рус.* ⟨ *полин.*] *и.* Тәү тормош кешеләрендә: бәлә килеү ҡурҡынысы менән ниндәйҙер һүҙ, эш-ҡылыҡ йәки берәй нәмәнең тыйылыуы.

**ТАБУТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Мәйетте һалып күмә торған ҡапҡаслы оҙонса махсус ҡумта. *Һеҙҙе киттеләр алып, ағас табутка һалып. Нисек сабыр итербеҙ, беҙҙәр был ерҙә калып.* М. Ғафури. *Табутты таҫтамал менән дүртәү күтәреп барабыҙ.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Мәйетте һалып йыуа торған ялғаш.

**ТАБЫҠ** *и. диал. кар.* **тап** [2].

**ТАБЫЛДЫҠ** *с.* **1.** Табылған, табып алынған. *Табылдык бәке. Табылдык китап.* ▪ *Мусакайҙың атаһы .. теге табылдык атты менеп китте.* Б. Бикбай.

**2.** *и. мәғ.* Төрлө тикшеренеү, эҙләнеү юлдары менән табылған нәмә. *Археологик табылдык.* ▪ *Ғалимдар төрлө табылдык буйынса теге йәки был урында кешенең кайһы быуатта йәшәгәнен бик дөрөҫ белә ала.* Н. Мәжитов.

**ТАБЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **табыу** 1—6. *Дуҫ табылды. Әйбергә эйә табылды. Бай газ яткылыҡы табылды. Яңы археологик комарткы табылды. Эшләп табылған акса. Якшы тип табылған әҫәр.*

◆ **Табылып тора** сәбәбе, яйы сығып тора тигән мәғәнәлә әйтелә. *Йүнһеҙгә бәлә табылып тора.*

● *Баш һау булһа, бүрек табылыр.* Әйтем. *Табылмаған тауҙай күренә.* Мәҡәл.

**ТАБЫН** [1] *и.* **1.** Күмәк кешегә әҙерләп ҡуйылған ашамлыҡ һәм шул ашамлыҡ ҡуйылған ашауэсеү урыны. *Аш табыны. Сәй табыны. Табын әҙерләү. Табынға килтереү. Табынға ултыртыу. Табынға сакырыу.* ▪ *Ашка ултырҙылар. Ғәҙәтсә, табынға тәүҙә каҙы-ял, ит куйылды.* Б. Бикбай.

**2.** Аш тирәләп ултырған төркөм. *Ҙур табын. Табын булып ултырыу.* ▪ *Беҙ бер табын булып, тамак ялғап алған арала, салғыларын күтәреп, .. [бесәнселәр] йыйыла башланы.* С. Кулибай. / Ҡунаҡ-һыйға йыйылған кешеләр төркөмө; мәжлес. *Ирҙәр табыны. Катын-кыҙҙар табыны.* ▪ *Табын гөрләй, һайрашалар коҙасалар, коҙалар.* Т. Арслан. *Табын короп, халык йыйып, түйҙәр яһарбыҙ әле* (Халыҡ йырынан).

**ТАБЫН** [2] *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме. *Барын табын. Кесе табын. Кәлсер табын. Йомран табын. Кара табын.* ▪ *Яландың капуртаһынан сик һыҙығы уткән, бер якта катайҙар, икенс якта табындар көн күргән.* Ә. Вәхитов.

**ТАБЫНДАШ** *и.* Бер табында ултырған кешеләр. *[Карт:] «Әйҙә, һалдат, табындаш бул»,— тип, тоғонан сөсө кумәс, бешкән йомортка, тоҙ сығарып һалды.* А. Таһиров.

**ТАБЫНДЫРЫУ** *к.* Табынырға мәжбүр итеү; инандырыу. *Ике нәмә: әүәле — алла, икенсе — кыҙ, бәндәләрҙе көҙрәтенә табындырған.* Ш. Бабич.

**ТАБЫНСЫ** *и.* Мәжлесте алып барыусы; көрәгәсе, аяҡсы. *Көрәгә асып, кымыҙ койоу табынсының эше ул.* М. Буранғолов.

**ТАБЫНЫУ** *к.* **1.** Кем йәки нимәнелер кеше аңынан һәм тәбиғәт көсөнән өҫтөн күреп, уға баш эйеү, һыйыныу. *Аллаға табыныу.* ▪ *Ул вакытта йәшәгән кешеләр .. быуаттар буйы һүнмәй янған уттың серенә төшөнә алмаған. Уттан улар бик куркkан, утка табынған.* Д. Бураҡаев.

**2.** *күсм.* Кем йәки нимәгәлер бөтә күңелде биреү, уға баш эйеү. *Йөҙҙәреңә генә түгел, эҙҙәреңә табынамын.* М. Кәрим. *Бөтһөн коллок, бөтһөн һатлык йәндәр! Бөтһөн табыныу алтын-көмөшкә!* Д. Юлтый.

**ТАБЫНЫШЫУ** *к. урт. кар.* **табыныу.**

**ТАБЫР** [*рус.* табор ⟨ *төрк.*] *и.* **1.** Күсеп йөрөгән сиғандар төркөмө һәм шулар туҡтаған урын. *Сиғандар табыры.*

**2.** *кар.* **тораҡ** 1. *Бесәнселәр табыры.*

**ТАБЫТ** [*рус.* тавот] *и. һөйл.* Кейемгә тейеп, тиҙ генә бөтмәй торған бысраҡ; тап. *Май табыты.*

**ТАБЫТЛАУ** *к. һөйл.* Табыт тейҙереп бысратыу.

**ТАБЫУ** *к.* **1.** Кемделер йәки нимәнелер эҙләп, ҡарап алыу. *Атты табып алып кайтыу. Таба алмай йөҙәү.* ▪ *Төйөнсөктәр араһынан таҙа күлдәкте эҙләп таптым.* С. Агиш. / Эҙләп, йөрөп, кәрәҡ нәмәне булдырыу. *Йокларға урын табыу. Эш табыу. Юлға акса табыу. Әйтергә һүҙ таба алмай тороу.* ▪ *Калала беҙгә фатир табыуы ла еңелгә төшмәне.* Т. Йәнәби. *Каятауҙан төшөргә бер ниндәй ҙә әмәл таба алмай, [Оморҙак] өс көн, өс төн ашамай, эсмәй ята* (Әкиәттән). / Нимәнелер уйлап сығарып, бар итеп күрһәтеү. *Сәбәп табыу.* ▪ *[Тимерсе] барған һайын бер һылтау таба: «Миндә бак төпләй торған калай юк,» — ти.* М. Тажи. / Тикшеренеү, эҙләнеү юлы менән алыу, булдырыу; асыу. *Алтын табыу. Күмер яткылығы табыу. Нефть табыу. Яңы химик элемент табыу. Нефть эшкәртеүҙең яңы методын табыу.* / Уйлап, иҫәпләп билдәләү, асыу. *Йомакты табыу. Билдәһеҙ һанды табыу. Мәсьәләнең яуабын табыу. Һүҙҙең тамырын табыу.* ▪ *Диңгеҙҙән дә ятыулы, Уралдан да артыулы — нимә булыр, әйт шуны, сәсән булһаң, тап шуны* (Әйтештән). / 2-се, 3-сө зат ялғауҙары менән килеп кемдеңдер эшен, һүҙен, ҡылығын хупламағанды, уға мыҫҡыллы ҡараште белдерә. *Тапкан вакыт! Таптың һүҙ! Тапканһың эш! Тапкандар батыр кешене!*

**2.** Эйәһеҙ йәки файҙаланылмай ятҡан нәмәгә осрау, юлығыу, уны күреп алыу. *Кульяулык таптым. Юлдан акса таптык.* ▪ *Ана бер кыҙыл әтәс әллә нәмә тапкан да көрт-көрт тип тауыктар сакыра.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Осратыу, тап килтереү. *Дуҫ табыу. Юлдаш табыу.* ▪ *Күп илдәрҙә йөрөнөм, үҙ илемдәй илдәр тапманым* (Халыҡ йырынан).

**4.** Эшләп, көс түгеп алыу, материаль байлыҡ булдырыу. *Мал табыу. Акса табырҙай кеше.*

▪ *[Фәтих Ғәлимә еңгәнең] берҙән-бер балаһы, шуның арҡаһында туҡ, шуның тапҡанын ашай.* Б. Ишемғол. **Малды тапҡан баҡһын** малды тапҡан кеше үҙе ҡараһын, үҙе файҙаланһын тигән мәғәнәлә әйтелә. **Тапҡанды эттән ашатыу** тапҡан малды теләһә ҡалай әрәм-шәрәм итеү. *[Мәғфура:] Ҡәйнешкәйем, инде элекке йылдарҙағы кеүек тапҡаныңды эттән ашатып, арҡаңды беттән ашатып подпаскала йөрөмә.* Һ. Дәүләтшина.

**5.** Кем йәки нимәләлер ниндәйҙер бер үҙенсәлек күреү, уны таныу. *Урмандың йәмен табыу. Әҫәрҙә реаль тормош сағылышын табыу. Уйындың ҡыҙығын табыу. Эштә үҙеңдең бәхетеңде табыу.* / Төп килештәге исемдәргә эйәреп, ошо исемдән аңлашылған төшөнсәне күңелдә кисергәнде, күңел менән ҡабул иткәнде белдерә. *Йәм табыу. Йырҙан ләззәт табыу. Эштән тәм табыу.* ▪ *Өйҙөң һис кенә лә кото юк, табырмын тимә толка.* А. Игебаев.

**6.** Төшөм килешендәге эйәлек ялғаулы исемдәргә эйәреп, нимәнелер ғәмәлдә бар итеү, булдырыу тигән төшөнсәле һүҙбәйләнеш яһай. *Баланың көйөн табыу. Кешенең күңелен табыу. Эштең яйын табыу.*

**7.** Сифат йәки рәүеш мәғәнәһендәге һүҙҙәргә эйәреп, ниндәйҙер эш-хәл, һүҙгә һ. б. ҡарата тыуған фекерҙе белдергән һүҙбәйләнеш яһай. *Кәрәк(ле) тип табыу. Тейеш(ле) тип табыу. Урынһыҙ тип табыу. Яраҡһыҙ табыу.* ▪ *Айбулат врачтың орошоуын урынлы тип тапты.* Һ. Дәүләтшина.

**8.** Донъяға килтереү (баланы); тыуҙырыу. *Бала табыу. Ҡыҙ табыу.*

♦ **Ваҡыт табыу** берәй эш өсөн ваҡыт бүлеү. **Ҡуян бала тапҡан ҡуяр урын тапмаған** булған әйберҙе нисек файҙаланырға белмәгән кешегә ҡарата әйтелә. **Тапма табыу** *ҡар.* **тапма. Телдән табыу** тейешле-тейешһеҙгә һөйләнеп, зыян күреү. **Уйлап табыу** *ҡар.* **уйлау. Уртаҡ тел табыу** *ҡар.* **тел** 2. **Эҙләгәнен тапты** (*йәки* **тапҡан**) тәртибе, тәрбиәһеҙлеге менән бәләгә тарығанда шелтәләп әйтелә.

● *Алда булһа ҙур теләк, эштән ял таба йөрәк.* Әйтем. *Ир табыусы, ҡатын өләшеүсе.* Әйтем. *Күңел тапмаҡ — бер һүҙ.* Әйтем. *Тартай теләнән табыр.* Мәҡәл. *Яңғыҙ егеткә бала тапмаҫ ҡатын тап булыр.* Мәҡәл.

**ТАБЫШ** *и.* **1.** Түгелгән көс йәки аҡсанан килгән өҫтәмә файҙа, төшөм. *Саф табыш. Табыш алыу. Табыш биреү.* ▪ *Яҡшының сауҙаһында һағыш булмаҫ, сауҙаһында ямандың табыш булмаҫ.* Аҡмулла. *Дәүләттең аҡса тупланмаларын булдырыуҙа табыштың роле һиҙелерлек үҫәсәк.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 27 ноябрь.

**2.** Эшләп, көс түгеп тапҡан нәмә. *Балалар тыуып, ғаиләә ишәйеп киткәс, балтасының табышы ашарға ла етмәй башла[й].* Х. Мохтар.

**3.** Эҙләп-юллап тапҡан нәмә. *Бабай улдары менән һәр көн иртәнсәк һунарға китә, кисен ҙур табыш менән ҡайта торған булған* (Әкиәттән). / *күсм.* Ҡулға төшкән, ҡулға эләккән нәмә. *Разведчик өсөн «тел» иң ҙур табыш инде ул.* Ә. Вәли.

**4.** Осрап, табып алған нәмә; табылдыҡ. *«Байназар хазина тапҡан!..» тигән хәбәрҙәр тотош ауылға таралды.. Йәштәр ҡыҙыҡһынып, ул табыштарҙы тиҙерәк үҙ күҙҙәре менән күрергә ашҡындылар.* Б. Бикбай.

□ **Табыш итеү** 1) ниҙелер кәсепкә әйләндереү. *Усман .. Мырҙаханды яусы итергә булды. Шундай эште табыш итеп алған Мырҙахан ең һыҙғанып яусылыҡ эшенә тотоноп китте.* Ж. Кейекбаев; 2) эшләп мал табыу. *[Егет:] Берәй яҡҡа китеп эш эҙләйем, булмаһа. Аҙыраҡ табыш итеп, йүнәйгәс, ҡайтып әсәйемде ҡарармын* (Әкиәттән).

● *Ир табышы менән мырҙа.* Мәҡәл. *Ит тураууы — табыштыр, ара-тирә ҡабыштыр.* Әйтем.

**ТАБЫШЛЫ** *с. һөйл.* Табыш килтергән, файҙалы, төшөмлө. *Табышлы эш.*

♦ **Табышлы булыу** нимәлер табып алыу. *Портфелде ҡуш ҡуллап күтәреп алды ул [Ғариф]: «Әл-лә-лә, юҡтан ғына табышлы булдым бит әле».* Б. Бикбай.

● *Ҡамышлы күл табышлы.* Мәҡәл.

**ТАБЫШМАҠ** *и. ҡар.* **йомаҡ.**

**ТАБЫШЫУ** *к.* **1.** *урт. ярҙамл. ҡар.* **табыу** 1. *Йомаҡ табышыу. Табышып биреү.*

**2.** Эҙләп йәки тап килеп осрашыу. *Беребеҙ алтын, беребеҙ көмөш — ҡайҙан килеп табыштыҡ* (Халыҡ йырынан).

● *Кеше һөйләшеп танышыр, мал кешенләп табышыр.* Мәҡәл.

**ТАБӘҠӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Төркөм, синыф, ҡатлам. *Юғары табәҡә кешеләре.*

**ТАВТОЛОГИК** *с. әҙ.* Тавтологияға мөнәсәбәтле. *Тавтологик эпитет.*

**ТАВТОЛОГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. әҙ.* Әйтелгән төшөнсәнең мәғәнә яғынан яҡын торған икенсе һүҙ менән ҡабатланыуы.

**ТАҒАМ** *и. ҡар.* **тәғәм.**

**ТАҒАН** *и.* **1.** Бер яҡ баштарын бергә беркетеп, икенсе баштарын тарбайтып ергә ҡуйған өс йәки дүрт таяҡ (төрлө нәмә аҫыу өсөн ҡулланыла]; өстаған. *Таған ултыртыу.* ▪ *Иртәнсәк Әхмәҙи урам уртаһына таған ҡороп .. айыуҙы ҡубә арҡаны менән аҫып ҡуйҙы.* Ж. Кейекбаев. / Яланда аш бешереү өсөн эшләнгән ошондай уҡ ҡулайлама. *Тағанға эленгән сәйнүктә урғылып сәй ҡайнай.* Ф. Рәхимғолова. **Таған аҫыу** бешеренергә таған ҡуйыу. *Шәмсениса таған аҫып, усаҡ яғып ебәрҙе.* Ф. Әсәнов. / Нимәгәлер терәк хеҙмәтен үтәгән саталы ҡулайлама. *Тағанлы саҡма мылтыҡ.* ▪ *Мотоциклын төтәтә-төтәтә кемдер килә. [Ғөбәйҙулла] ҡулын күтәрҙе.. Теге кеше машинаһын тағанына ултыртты ла, күҙлеген һалып былар эргәһенә килде.* Р. Солтангәрәев. / Еүеш бесәнде кәбәнгә өйгәндә, аҫҡа ҡыуышлап ҡороп ҡалдырған ағастар. *Заһит боталған ҡайындың ян-яғынан төкәтеп, таған ҡуйҙы. Һыулыраҡ бесән кәбәндә кипһен өсөн, аҫтан тәҙрә һымаҡ тишек ҡалдырҙы.* Я. Хамматов.

**2.** *күсм.* Терәк, таяныс. *Шулар [йәштәр] булды актив колхозда, шулар булды колхоз тағаны.* Д. Юлтый.

**3.** Язаға тарттырылған кешене аҫыу өсөн ҡулланылған терәүле бейек ағас; дар ағасы.

*Бер табанға, дуҫтар, баҫайыҡ. Бер табанға, дуҫтар, баҫмағанды тағандарға тотоп аҫайыҡ* (Халыҡ йырынан).

**4.** Ултырып бәүелеү өсөн арҡыры ағасҡа тоҡан итеп тағылған бау; бәүелсәк. *Таған атыныу.* ■ *Насар булһа ла атыныу өсөн таған да яһап ҡуйылған.* Р. Ғабдрахманов.

**ТАҒАНЛАУ** *ҡ.* **1.** Таған (1 мәғ.) рәүешле итеү. *Мылтыҡтарҙы биш тағанлап ҡуйҙыҡ та .., теҙелешеп ултырып, тәмәке тоҡандырҙыҡ.* Д. Юлтый.

**2.** Таған (1 мәғ.) ҡуйыу, тағанға һалыу. *Бесәнде тағанлап өйөү.* ■ *«Бына, Гөлнур,— тинем,— бынау ашлыҡ — дүрт тағанлап ҡуйған сүмәлә».* Б. Вәлит.

♦ **Дүрт тағанлау** алға эйелеү йәки тубыҡланып ике ҡулға таяныу; имгәкләү. *Дүрт тағанлап йөрөү.*

**ТАҒАРА** *и.* Балауыҙ тотоу өсөн түмәр умарта йәки солоҡ эсенә ҡуйылған нәҙек кенә таяу ағастар. *Кеше солоҡтоң тағараларын иплəп, балауыҙҙарын рәтләп, эсен таҙартып ҡуйған.* Ж. Кейекбаев.

**ТАҒАРАҠ**[1] *и.* **1.** Оҙонса йәйпәк һауыт; ялғаш. *Кер тағарағы.*

**2.** Малға ашлы һыу йәки бүтән аҙыҡ һалып бирә торған һауыт. *Эт тағарағы.* **Һыйырҙың һөтө тағараҡта** һыйырҙы һөтлө итеү өсөн ашатырға кәрәк тигән мәғәнәлә әйтелә.

**3.** Ҡош-ҡортҡа ем һала торған аҫмалы таҡта. *[Вил] тағараҡ элеп ағасҡа, емдәр һипте.* Ф. Рәхимғолова.

♦ **Үлем** (*йәки* **әжәл**) **тағарағы** ултырып китеү өсөн хәүефле, ышанысһыҙ нәмәгә (арба, кәмә һ. б.) ҡарата әйтелә.

● *Һыуҙан ҡурҡҡан тағараҡҡа төшөп үлгән.* Мәҡәл.

**ТАҒАРАҠ**[2] *и. диал.* **1.** Сағараҡ. *Буҙекәй кантон ята аҡ тирмәлә, тағарағын асып, таң атҡас* (Халыҡ йырынан).

**2.** *ҡар.* **тағара.**

**ТАҒАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит. дини* Аллаға табынғанлыҡ. *Кутпәрҙе дошман шулай алдай икән: бер әҙәм донъяны ҡыуа икән, тағат менән ғибәҙәтте уҡый икән — алдап йөрөп, сихырлап бисараны, ахырында иманынан юя икән.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ТАҒАТТЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **тағатыу** 1.

**ТАҒАТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **тағатыу** 1. *Тағатылған бау.*

**ТАҒАТЫУ** *ҡ.* **1.** Уралған, ишелгән, йомарланған нәмәне һүтеү; таратыу. *Арҡанды тағатыу. Йомғаҡты тағатыу. Толомдо тағатыу. Төргәкте тағатыу.* ■ *Уҡтың һабағына ҡағыҙ уралғанын күргәс, [Емеш] аптыраны.. Алып, тағатып ҡараны.* З. Биишева. *Ҡылғандар, ҡылғандар далаға тулғандар, сәстәрен ҡояшҡа тағатып ҡуйғандар.* Р. Шәкүров.

**2.** *күсм.* Үҙ тәртибенә һалып асыҡлау. *[Мәймүнәнең] һүҙҙәрен тағатып ҡараһаң.., «яраған инде ауыл кешеһенә» булып сыға.* С. Агиш. / Төрлө уй-кисерештәрҙе онотолдороу; таратыу. *Ә шулай ҙа инәй моңайҙы бит, ахыры, йыр уйын тағатты.* К. Кинйәбулатова.

**ТАҒАТЫШЫУ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **тағатыу** 1.

**ТАҒУН** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Бик йоғошло үләт ауырыуы; чума. *Бер нәмә менән иҫәпләшмәйҙәр. Башҡорт йортон тағун ауырыуы кеүек интектерәләр.* Ш. Шәһәр.

**ТАҒЫ** *ҡ.* **1.** (*йәки* **тағы ла**) Яңынан, ҡабаттан йәнә. *Яҙ көнө мин тағы ла өйрәнгән ҡаҙаҡ ара һына уҡытырға барҙым.* Т. Йәнәби. *Бөгөн быны минең йырҙарымда һинең рәсемең тағы уянды* Х. Ҡунаҡбай. / Өҫтәмә рәүештә; йәнә. *Ҡарама лы ауылында тағы ла бер ғаилә барлыҡҡа килде* М. Тажи. *[Ғәләү:] Тфү! Тағы күпме ҡотороп икән был буран!* Б. Бикбай. *Ул һөйләй донъяны тағы бер серен асҡан кеүек.* Р. Ниғмәти / Өҫтәмә көс менән. *Атҡа берҙе һуҡтым. А тағы ла ҡанатланыбыраҡ киткән кеүек булды* Д. Юлтый. *Кукттәге йондоҙ тағы ныҡыраҡ йымылдай.* Ш. Бабич.

**2.** *киҫ. мәғ.* Үртәнеү төҫмөрө булған һора йөкмәткеле һөйләмдәрҙә ризаһыҙлыҡ төшөн сәһен көсәйтә. *Ул ни тигән һүҙ тағы? Ваҡытһы ниндәй ҡунаҡ тағы? Нимә булды тағы?* ■ *Бы буранға тағы ни булған, нимәһенә шулай ҡотор ған?* Ғ. Амантай. / Нимәнелер фараз иткә һөйләмдәрҙә фаразлыҡ менән иҫкәртеү, киҫәте төшөнсәһен көсәйтә. *Һуңға ҡалып ҡуйма тағы* ■ *[Яҙар:] Ағай, был машина мине алып ките бармаһын тағы..* Б. Ишемғол. / Шарт һөйләм дәрҙә эш-хәлдең булыу-булмауына иҫ китмә төшөнсәһен көсәйтә. *Китһә тағы, китеп ултыр һын. Яуһа тағы, яуа бирһен.* / Ҡылымдары эйәреп, төрлө хис-тойғо, мөнәсәбәт белдере дөйөм төшөнсәне көсәйтә. *Көлгән була тағы Һөйләнә инде тағы. Үҙенә килешеп тора тағы Бөтәһен дә белә тағы. Етмәһә, инәлтә тағы*

**3.** *терк. мәғ.* Һаналып киткән тиң киҫәктәрҙ теркәй; һәм. *Бай үҙе бисәһе менән, тағы Ҡолмо ҙа старшина бисәләре менән.., тағы әллә кемдә шунда.* Т. Хәйбуллин.

♦ **Етмәһә тағы** өҫтәүенә. *Буран ҡутәрелд етмәһә тағы ҡараңғы төштө.* **Тағы бер хәл** сар һыҙҙан риза булған һымаҡ иткәндә әйтел ярай инде. *Киткәндәргә тағы бер хәл, ҡыйы бында ҡалғанға* (Халыҡ йырынан).

**ТАҒЫЛМА**[1] *с.* Тағып йөрөтмәле. *Тағылм арба. Тағылма ҡорамалдар. Алҡа, муйынсаҡ тағылма биҙәүестәр.*

♦ **Тағылма исем** *һөйл.* ҡушамат. *Зифа апа ҙың да .. бер нисә тағылма исеме булды. Ҡа һылары уны «айыу» тип йөрөттөләр.* К. Мәргә

**ТАҒЫЛМА**[2] *и.* Гел эйәреп, тағылып йөрөг кеше. *Ул ҡунаҡҡа килһә, тағылмаһы ҡалм торған.*

**ТАҒЫЛМАЛЫ** *с. ҡар.* **тағылма**[1].

**ТАҒЫЛЫЙ: ағылыйға тағылый** *һөйл. ҡа* **ағылый.**

**ТАҒЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **тағыу** 1— *Дуғаға тағылған ҡыңғырау. Тағылған исе* ■ *Иң аҙаҡтан Аҡъял батыр арҡанға үҙе таг лып менеп киткән* (Әкиәттән).

**2.** Киткән, йөрөгән кешегә ҡушылыу; эйәре *Тағылып йөрөү. Тағылып килеү.*

♦ **Тағылып сығыу** *шул уҡ* **йәбешеп сығ** (*ҡар.* **йәбешеү**).

**ТАҒЫЛЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **тағылыу** 2. *Таг лышып йөрөү.*

**ТАҒЫМ** *и. кар.* **такым.**

**ТАҒЫН** *р. диал.* Тағы.

**ТАҒЫНЫУ** *к.* Үҙеңә биҙәү эйберҙәре тағыу. *Кашмау, һакалдар тагыныт йөрөү.*

**ТАҒЫУ** (так*ә*) *к.* **1.** Эйәртеп алып китеү өсөн нимәгәлер эләктереү, бәйләү, беркетеү. *Бауга тагыу.* ■ *Фәсхи менән Кәмәр тәртәгә ике үгеҙ, арба артына бер ат тагып юлга сыкты.* Т. Йәнәби. *Биш вагонды тагып паровозга, көрәш юлын ярып барабыҙ.* Ғ. Амантай. *Акъял батыр .. ер аҫты хазинаһын күнәге-күнәге менән аркан осона тагып торган, өҫтән тартып алып торгандар* (Әкиәттән).

**2.** Нимәгәлер куша беркетеү. *Кыңгырау тагыу. Кармакка еп тагыу.* ■ *Рәхимә сәс үрмәһенә таккан .. аскыстарын шалтыратып .. алдына һалды.* һ. Дәүләтшина. / *күсм.* Кешегә ниҙелер көсләп кушыу, ирекһеҙләп мәжбүр итеү. *Эш тагыу.* ■ *[Ғәлиә] уҙ фекерен .. кешегә көсләп такмай, кәңәшләшә, килешә, шунан эшләй.* «Башкортостан кыҙы», 1969, № 2. / *күсм.* Кушамат биреү, исем атау. *Миңә лә бер заман шулай кыҙык кына исем тактылар ҙа куйҙылар.* Х. Түләкәев. / *күсм.* Берәйһенең өҫтөнә ғәйеп ташлау, яғыу. *Уҙ гонаһын кешегә тагыу.* ■ *Яңы Советка .. туҙга яҙмаган гәйептәр такмаксы булып, әллә ниндәй ялган хәбәрҙәр тараталар.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Кәүҙәгә, кейемгә беркетеү, каҙау, эләктереү. *Алка тагыу. Значок тагыу. Орден тагыу. Сәскә таҫма тагыу.* ■ *[Фатима:] Был алканы Сакай агайҙың катыны ла такманы.* Б. Бикбай. *Ысын мәрйен муйынсаңды такма муйыныңтал дырып* (Халык йырынан). / Кәүҙәгә аҫыу, билгә беркетеп бәйләү (корал, корамалдарға карата). *Кылыс тагыу. Наган тагыу.* ■ *Билгә таккан көрәк, фляжка, сумка кайышты баҫып, билде ауырттыра.* Д. Юлтый. *Беҙҙең хужа .. һары сумка тагып йөрөй.* Т. Арслан.

**4.** Кәүҙәгә, тәнгә куша бәйләп беркетеү; кейеү. *Коньки тагыу.* ■ *Мин тәү тапкыр быйыл саңгы тактым — калын карҙар аша юл ярам.* Ғ. Рамазанов. *Кылыс аҫып, шпор тагып атланды һалдаттар атка* (Бәйеттән).

**5.** *диал.* Тегеү, баҫыу. *Һәҙәп тагыу. Калпакка тәңкә тагыу.*

**ТАҘ** *и.* **1.** Сәс төбөнә сыға торған йоғошло кысыу. *Таҙ төшөү. Башка таҙ йоккан.* ■ *Беҙгә килгән яусының түбәһендә таҙы бар* (Туй йырынан). **Кеймә таҙ** башты тотош каплап алған таҙ. / Шул ауырыу менән ауырыған кеше. / Башкорт фольклорында: карауға мәжнүн, асылда төплө акыллы, хәйләкәр персонаж. *Таҙҙың юлдаштары яткас та йокога киттеләр, ти* (Әкиәттән).

**2.** *һөйл.* Сәсе койолған такыр, ялтыр баш.

◆ **Таҙ төкөштөрөү** *кар.* **төкөштөрөү. Таҙ бөркөтө** *диал.* таҙғара. **Таҙы калкыу** кемдер юкка ғына туҙынып, кыҙып киткәндә әйтелә.

● *Таҙҙың таҙы бөтһә лә табы бөтмәҫ.* Мәкәл. *Тора-тора кул һаҙга әйләнә, ир таҙга әйләнә* Мәкәл.

**ТАҘА** [1] *с.* **1.** Бысранмаған, керһеҙ, бысрак теймәгән. *Таҙа кулдәк. Таҙа кейем. Таҙа кул. Таҙа быяла. Таҙа иҙән. Таҙа йөрөү. Таҙа йыуыу. Йыуан гына кеше бөтәһенә караганда ла таҙа кейенгән.* С. Агиш. / Йыйыштырылған, бысрак һәм сүп-сар булмаған, караулы. *Таҙа аҙбар. Таҙа бакса. Булмәне таҙа тотоу.* ■ *Фатир якшы, таҙа, семьяһы бәләкәй.* Д. Юлтый.

**2.** Буялыу, бысраныуҙан ситтә торған, бысратмай торған. *Яҙыу эше — таҙа эш. Бесән сабыу — таҙа эш.*

**3.** Сүп-сар, кый үләне булмаған. *Таҙа бакса. Таҙа баҫыу. Таҙа бойҙай.* / Башка матдә, башка төрлө нәмә катышмаған; саф. *Таҙа алтын. Таҙа спирт.* / Башка төрлө зат катышмаған; саф. *Таҙа нәҫел. Таҙа сорт. Таҙа канлы башкорт аттары.* / Бурьяк булмаған бысрак төшмәгән (йылға, һыуға карата). *Таҙа күл. Таҙа һыу.* / Һулауға иркен булған, саф (һауаға карата).

**4.** Йөҙө, өҫтө бер ни менән капланмаған; асык. *Таҙа күл өҫтө. Зәп-зәңгәр, тап-таҙа күк йөҙө.* / Өҫтөнә яҙыу төшмәгән. *Таҙа дәфтәр. Таҙа кагыҙ.* ■ *[Ғариф] таҙа бланктарҙы алып .. эске кеҫәһенә һалды.* Б. Бикбай.

**5.** *күсм.* Насар эштән ситтә торған, ғәйепһеҙ. *Таҙа кеше.* ■ *Мәсет эсенә байтак кына кеше йыйылган .. Элекке кешеләр, элекке ат карагы, хәҙер ҙә кулы таҙа булмаган Аллуңгар, Мәүлет бай улы .. тагы бер нисә кеше бар.* Ғ. Дәүләтшин / Насар уйы булмаған, гонаһһыҙ; саф. *[Һин] былай ҙа сибәр, шат, акыллы, бала кеүек таҙа күңелле.* М. Хәй.

**6.** *күсм.* Етешһеҙлектәре булмаған, еренә еткереп башкарылған (берәй эштең үтәлешенә карата). // *Таҙа эшләнгән эш.*

◆ **Таҙа белеү** (*йәки* **һөйләү, һөйләшеү**) берәй телде якшы белеү. *Русса таҙа һөйләшеү. Ғәрәпте таҙа белеү.* **Таҙа пар** *кар.* **пар** [3].

**ТАҘА** [2] *с.* **1.** Физик яктан нык; ныклы. *Таҙа ир. Таҙа беләк. Таҙа кәүҙәле кеше.* ■ *Имән кеүек таҙа инем мин ул сакта.* Н. Кәрип. / Ниндәйҙер эшкә шәп булған. *Ашауга таҙа. Эшкә таҙа булыу.* // *Таҙа ашау.*

**2.** Боҙоғо, сире булмаған, серек түгел. *Таҙа картуф.* ■ *Кыҙрас кыҙҙарҙың өлкәненә серек алма, .. иң кесеһенә кып-кыҙыл булып торган таҙа алма бирә* (Әкиәттән).

**3.** *диал.* Һау, сәләмәт. **Таҙа бул** (*йәки* **булһын, булығыҙ**) рәхмәт һүҙенә яуап рәүешендә әйтелә.

◆ **Таҙа кан** *шул ук* **саф кан** (*кар.* **кан** [1]).

**ТАҘАЛАТЫУ** *к. һөйл. йөкм. кар.* **таҙалау.**

**ТАҘАЛАУ** *к. һөйл.* Таҙартыу, таҙа итеү. *Кейемде таҙалау. Балаҫты таҙалау.*

**ТАҘАЛАШЫУ** *к. һөйл. урт. кар.* **таҙалау.**

**ТАҘАЛЫК** [1] *и.* **1.** Бысрамаған, керһеҙ, таҙа хәл. *Ырымбур беҙҙе уҙенең төҙеклөгө һәм таҙалыгы менән таңга калдырҙы.* К. Мәргән.

**2.** Башка нәмә, матдә катышмаған таҙа хәл. *Һауаның таҙалыгы. Орлоктоң таҙалыгын тикшереү.*

**ТАҘАЛЫК** [2] *и.* **1.** Физик яктан нык булған хәл; ныклык. *[Таминко] уҙенең таҙалыгы һәм көсө менән мактана белә, .. һөйләгәндә: «Беҙ рабочий халык»,— тип башлап китә.* Д. Юлтый.

**2.** *диал.* Һаулык, сәләмәтлек.

**ТАҘАРТКЫС** *и.* Ниҙе лә булһа таҙарта торған корамал. *Газ таҙарткыс.* ■ *Таҙарткыстар*

*йырлап сүп өрҙөрә, саф орлоктар төкөрә көн буйы.* Ғ. Мәсғүт.

**ТАҘАРТТЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **таҙартыу** 1—3. *Картуф таҙарттырыу.*

**ТАҘАРТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **таҙартыу** 1—3. *Таҙартылған ашлык.*

**ТАҘАРТЫУ** *к.* **1.** Керҙе, бысраҡты, сүп-сарҙы бөтөрөп таҙа итеү. *Аяҡты таҙартып инеү. Балаҫты таҙартыу. Кейемде таҙартыу. Өйҙө йыуып таҙартыу.* / Ҡаплап торған, ҡамасаулаған нәмәне алып таҙа итеү. *Аҙбарҙы тиҙәктән таҙартыу. Баҫыуҙы һаламдан таҙартыу. Быуаны таҙартыу. Мөрйәне ҡоромдан таҙартыу. Ҡарҙы көрәп, юл таҙартыу. Ел сығып күк йөҙөн таҙартты.* ■ *Улаҡтан бер ус бесән алдым да, ботинканы туҙандан таҙарттым.* С. Агиш. *Һалҡынса һауа инеп, үпкәләрҙе таҙартып сыға.* Ғ. Дәүләтшин. / Ышҡып таҙа итеү; ялтыратыу. *Кәстрүлде таҙартыу. Теште таҙартыу.*

**2.** Сүп-сарҙы, ҡый үләнен алып таҙа итеү. *Баҡсаны таҙартыу. Баҫыуҙа ҡый үләнен таҙартыу.* / Ҡатышҡан, ҡушылған нәмәнән айырып таҙа итеү. *Игенде таҙартыу. Орлоҡ таҙартыу машинаһы. Ҡоксты яндырып таҙартыу.* ■ *Хәҙерге ваҡытта бысраҡ һыуҙы биологик һәм химик юл менән таҙарталар.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 27 апрель. / *күсм.* Зыянлы элементтарҙан, кешеләрҙән азат итеүгә йүнәлтелгән эште аңлата. *Илде дошмандан таҙартыу.*

**3.** Аҙыҡты ашарға яраҡһыҙ өлөштәрҙән айырыу. *Еләк таҙартыу. Бәшмәк таҙартыу. Картуф таҙартыу. Тауыҡ таҙартыу.* ■ *[Әбей менән бабай] балыҡты таҙарта һалып, бешереп ебәргән* (Әкиәттән).

**4.** *күсм. һөйл.* Эсендә булған әйберен алып буш итеү. *Кеҫәне таҙартыу.*

**5.** *күсм.* Рухи яҡтан таҙа итеү. *Колхоз тормошо ла кешеләрҙең күңелдәрен таҙарта, баҙыкландыра, матурлай.* Б. Бикбай.

**ТАҘАРТЫШЫУ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **таҙартыу** 1—3. *Ҡураны таҙартышыу. Орлоҡ таҙартышыу. Еләк таҙартышыу.*

**ТАҘАРЫНЫУ** *к.* **1.** Кер-бысраҡтан арынып, таҙа хәлгә килеү. *Ҡош ҡағынып таҙарына.* ■ *[Атаһы балаларына:] Ете ҡат йыуынып, таҙарынып .. сирәмгә ятып йоҡлағыҙ* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Күңелде баҫып, игәп торған нәмәнән арыныу. *Кем генә кәңәш менән килмәй ине уның [Дилми ағайҙың] янына.. Рәхәтләнеп, йәндәре таҙарынып ҡайтып китә инеләр.* Р. Ғабдрахманов.

**ТАҘАРЫУ** [1] *к.* **1.** Бысрағы, кер-туҙаны бөтөп, таҙа хәлгә килеү; таҙаға әйләнеү. *Өй таҙарҙы. Өҫ таҙарып ҡалды.* / Ҡаплап торған, ҡамасаулаған нәмә бөтөп таҙа хәлгә килеү. *Офоҡ таҙарҙы. Күк йөҙө таҙарҙы.* ■ *Элекке тапанды ер ағастарҙан таҙара, иген баҫыуына, йә сабынлыкка әйләнә.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 23 июль. / Туты, күге бөтөп, таҙаға әйләнеү. *Самауыр таҙарҙы.*

**2.** Сүп-сары, ҡыйы бөтөп таҙаға әйләнеү. *Иген таҙарҙы.* ■ *Ҡат-ҡат һөрөп, яҡшы итеп эшләгәс, баҫыу таҙарҙы.* / Ҡушылған кәрәкһеҙ матдәһе бөтөп, таҙа, сафҡа әйләнеү. *Спирт таҙарҙы. Һауа таҙарҙы. Һыу таҙарҙы. Таҙарған бензин.* / *күсм.* Зыянлы элементтарҙан арыныу, азат булыу.

**ТАҘАРЫУ** [2] *к.* **1.** Тән тулыланып көрәйеү, ит ҡуныу. *Ҡыҙ элеккенән дә һылыуырак булып, таҙарып, тулыланып китә.* Б. Бикбай.

**2.** *диал.* Шәбәйеү, һауығыу.

**ТАҘҒАҠ** *и.* Кейек күҙәтеү өсөн ағас башына яһалған урын. *Таҙғак ҡороу.* ■ *Егет, ҡыркып ағас ботаҡтарын, таҙғаҡ яһай имән башына. Төн дә шунда менеп йоклап йөрөй, йыртҡыстар килгәндә каршына.* Б. Вәлит.

**ТАҘҒАРА** *и.* Башы һәм елкәһе ҡауырһынһыҙ, ҡара көрән төҫтәге бөркөт ҙурлыҡ ҡусмә ҡош (емтек ашай, ағас башына оялай). *Ҡарағастың бер айырсаһында борон-борондан таҙғара оялай, йыл да бер бала сығара торғайны.* С. Кулибай.

**ТАҘҘАР** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме. *Таҙҙар араһы. Таҙҙар нәҫеле.*

**ТАЖ** [1] [*фарс.*] *и.* **1.** Батшалыҡ билдәһе итеп һаналған аҫыл таштар менән биҙәлгән алтын баш кейеме. / *күсм.* Иң юғары хакимлек; батша власы.— *И, мәшһүр хан, затлы ил тажы, бер үҙеңдә илдең мохтажы.* М. Кәрим.

**2.** Япраҡ, сәскәнән үреп, башҡа кейеү өсөн яһалған нәмә. *Мин йыйып биргән зәңгәр сәскәләрҙән һин таж яһап башыңа кейгәйнең.* Ғ. Лоҡманов. *Сәскәләрҙән һиңә таж үрергә иң-иң аҫылдарын һайланыҡ.* Р. Ғарипов.

**3.** (*йәки* **таж япрағы**) Сәскәнең төҫлө япраҡтарҙан торған баш өлөшө. *Күбәләк таж. Аҡ тажлы ләлә сәскәһе.* ■ *Ысык күнгән гөлдәр тажында мин ҡояшты күрҙем.* Р. Назаров.

**4.** *күсм.* Ниҙеңдер иң юғары күрһәткесе. *Поэзияның тажы — һис шикһеҙ, поэма.* К. Әхмәтйәнов.

**ТАЖ** [2] *окш.* **1.** Ныҡ ауыртҡан, ҡурҡҡан саҡта тамаҡ төбө менән ҡысҡырған яман тауышты белдергән һүҙ. *Таж итеп ҡалыу.*

**2.** Ҡайһы бер йәнлек, ҡоштоң көслө ғыжылдауыҡ тауышын белдергән һүҙ.

**ТАЖЖАР** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Сауҙагәр. *Уңыш тапты тажжар сауҙаһында.* М. Өмөтбаев.

**ТАЖИК** *и.* Тажикстандың төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (иран телдәренең береһендә һөйләшә). *Тажик халҡы. Тажик ҡыҙы. Тажик теле.*

**ТАЖИКСА** *р.* **1.** Тажик телендә. *Тажикса һөйләшеү.*

**2.** Тажик халҡына хас, тажиктар кеүек. *Тажикса кейенеү.*

**ТАЖМЫҠ** *с. диал.* Йыуан, итләс. *Тажмыҡ малай.*

**ТАЖ-ТОЖ** *окш.* Ҡабат-ҡабат таж иткән тауышты белдергән һүҙ. *Таж-тож итеү. Таж-тож килеү. Таж-тож ҡысҡырыу.*

**ТАЖ-ТӘХЕТ** *и. йыйн.* Батша власы, батшалыҡ. *Таж-тәхеттәр китһен йөҙ түбән.* Ғ. Мәсғүт.

**ТАЖЫЛДАУ** *к.* Таж-тож килеп ҡысҡырыу, таж-тож итеү. *Тажылдап тартай ҡысҡыра. Ҡамышлыкта ҡыр өйрәгенең тажылдағаны ишетелде.*

**ТАЗ** [*рус.*] *и. анат.* Оса һөйәге (*кар.* **оса** 1).

**ТАЗРАЙТЫУ** *к.* **1.** Ҙур итеп, кәпәйтеп, алға сығарыу; киреү. *Эсте тазрайтыу.*

2. Нык итеп кереп асыу (күҙҙе).

**ТАЗРАЙЫУ** *к.* **1.** Ҡабарып, ҙур булып алға сығыу (эс-ҡорһаҡҡа ҡарата).

2. Ҙур булып асылыу (күҙгә ҡарата).

**ТАЗРАНЛАУ** *к.* Ауыр баҫып саҡ йөрөү (ҙур эсле кешегә ҡарата). *Тазранлап атлау.*

**ТАЗ-ТОЗ** *окш.* Яман итеп ҡысҡырған эсе тауышты белдергән һүҙ. *Таз-тоз ҡысҡырыу. Таз-тоз килеү.*

**ТАЗЫ** [*фарс.*] *и.* Оҙон аяҡлы, ас эсле, мороно оҫло һунар эте; ҡуян эте. *Ологатай менән Балагатай .. ҡырпаҡ ҡар яуғас, бүреһүгәр аттарын менеп, тазы эттәрен .. эйәртеп, Ирәндеккә һунарға сыҡҡан.* Н. Иҙелбай.

**ТАЗЫЛДАТЫУ** *к.* Таз-тоз ҡысҡыртыу. *[Зыян эшләһәң] сыскан тәпеһенә ҡыҫтырып тазылдатырмын.* С. Кулибай.

**ТАЗЫЛДАУ** *к.* Таз-тоз итеү, таз-тоз килеп ҡысҡырыу. *Тазылдығы сығыу.*

**ТАИФӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Төркөм.

2. Бер дингә, бер ырыуға ҡараған халыҡ төркөмө. *Ҡыпсаҡ таифәһе. Төрки таифәләр.*

**ТАЙ** *и.* Бер йәше тулып, икенсе йәшкә киткән йылҡы малы. *Ҡырҡмыш тай. Ябаға тай.* ■ *Талдан тал үҫә, тайҙан матур байтал үҫә* Ш. Бабич. / *диал.* Ошо йәштәге һыйыр, болан малы; тана. // *Тай үгеҙ.* ■ *Арҡаларҙан боландар килә, алдарында уйнай тайҙары* (Халыҡ йырынан).

♦ **Башҡа тай типмәгән** (*йәки* **типкәнме ни**) *кар.* **баш. Тай мендереү** берәй яҡҡа ебәреү; олаҡтырыу.

● *Ябаға тайҙы хурлама, яҙға сыкһа ат булыр.* Мәҡәл.

**ТАЙГА́** [*рус.*] *и.* Европа, Азия, Американың төньяғындағы ылыҫлы ағастарҙан торған ҡара урман. *Кейек, айыу, юлбарыҫтар йәшеренделәр тайга төбөнә.* Р. Ниғмәти.

**ТАЙҒАҠ** *с.* **1.** Баҫҡанда аяҡ шыуып торған; шыма. *Тайғаҡ боҙ. Тайғаҡ юл. Тайғаҡ булыу.* // *Тайғаҡҡа әйләнеү.* ■ *Заман .. тайғаҡ бағана буйлап өҫкә үрмәләй башланы.* Ә. Вәли. *Оҙаҡ ямғырҙар яуҙы ла ҡапыл туңдырып ебәрҙе. Аяҡ аҫты тайғаҡ ине.* С. Агиш.

2. *күсм.* Шикле, ышыныςһыҙ (тормош юлына ҡарата). *Тайғаҡ юлға баҫыу.* ■ *Гөлнәзирә уның [улының] тайғаҡ юлға кереп барыуын һиҙмәне.* Ғ. Әмири.

**ТАЙҒАҠЛАНЫУ** *к.* Тайғаҡҡа әйләнеү, тайғаҡ булыу. *Әҙ генә еүешләнеп китһә лә, текә юл тайғаҡлана.* Ш. Янбаев.

**ТАЙҒАҠЛАУ**[1] *к.* **1.** Тайғаҡҡа әйләндереү, тайғаҡ итеү. *Һыу түгеп аяҡ аҫтын тайғаҡлап бөткәндәр.* Б. Бикбай.

2. Тайғаҡҡа әйләнеү, тайғаҡ булыу. *Һыу түгелеп, тайғаҡлап бөткән һукмаҡтар бер ҡалҡыулыҡтан төшөп, икенсеһенә күтәрелә.* Х. Ғиләжев.

**ТАЙҒАҠЛАУ**[2] *к.* Тегеләй-былай тайыу, тайып-тайып китеү; тайғылау. *Шофёр.. бысраҡ юлда тайғаҡлаған машинаның руленә тағы нығыраҡ тотона.* Н. Ғәлимов.

**ТАЙҒАЛАҠ** *с. кар.* **тайғаҡ.** *Тайғалаҡ юл.*

**ТАЙҒЫЛАУ** *к.* Тегеләй-былай тайыу, тайып-тайып китеү. *Ат аяҡтары тайғылап, тырмаша-тырмаша арбаны соҡорҙан сығар[ҙы].* М. Тажи.

**ТАЙҘЫРЫУ** *к.* **1.** Баҫҡанда аяҡ шыуып тороу: тотмау. *Резина табан тайҙыра.*

2. Урынынан ҡуҙғатыу; кимәлийетеү. *Быуынды тайҙырыу.*

3. *күсм.* Ниндәйҙер ғәҙәти бер һәләттән яҙҙырыу. *Хәлдән тайҙырыу. Бәҫтән тайҙырыу.*

4. *күсм. һөйл.* Урлап алып китеү; шылдырыу. *[Фәйрүш:] Кеше күҙ-колаҡ булмаған саҡта .. арышын да, бойҙайын да тайҙырып була.* Ҡ. Даян.

♦ **Күҙҙән тайҙырыу** *кар.* **күҙ. Табан тайҙырмай** эҙ һыуытмай; йыш. *Табан тайҙырмай килеп йөрөү.* **Юлдан тайҙырыу** насар, хата эшкә төшөрөү. *Юҡ, Айбулат, беҙҙең юлдан да дөрөҫ юл юҡ, беҙҙе... юлдан тайҙыра алмаҫтар.* Һ. Дәүләтшина.

**ТАЙҠАЛАУ** *к.* **1.** Ситкә сығыу, ситкә китеү; тайпылыу. *[Ат] ары бармай, бер улай, бер былай тайҡалай.* Һ. Дәүләтшина.

2. *күсм.* Әйткән һүҙҙән, алға ҡуйған эштән кире ҡайтыу, дүнеү. *Ҡунаҡ саҡырыуҙан тағы тайҡалап ҡарарға уйлаһалар ҙа, эш барып сығырлыҡ булманы.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТАЙЛАҠ** *и.* **1.** Бер йәше тулып үткән айыу балаһы. // *Тайлаҡ айыу.* / Бер йәше тулып үткән дөйә балаһы.

2. *диал.* Бер йәшлек тай.

**ТАЙЛЫҒЫУ** (тайлыҡ*ғ*) *к. кар.* **тайыу** 1, 2. *Быуын тайлығыу.* ■ *«Иплә кенә мен, тайлығып китмә»,— тине әсәйем.* Р. Низамов.

**ТАЙМ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и. спорт.* Спорт уйынының ваҡыт менән билдәләнгән бер өлөшө. *Беренсе тайм. Икенсе тайм.*

**ТАЙМЕ́НЬ** [*рус.* ⟨ *фин.*] *и.* Россия-ла төньяҡ Европа, Себер, Сахалин йылғаларында була торған, һөмбаштар ғаиләһенә ҡараған йыртҡыс балыҡ; ҡыҙылбалыҡ.

**ТАЙПАНЛАУ** *к.* Тайпан-тойпан килеү, тайпан-тойпан итеү. *[Эт] ҡыҫҡа ғына тәпейҙәрен арҡыс-торҡос баҫып, тайпанлап .. килеп тә етте.* З. Биишева.

**ТАЙПАН-ТОЙПАН** *окш.* Ян-яҡҡа сайҡалып, аушанлап атлаған хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Тайпан-тойпан килеү. Тайпан-тойпан баҫып өйрәктәр килә.*

**ТАЙПЫЛДЫРЫУ** *к.* Тайпылырға, ситләшергә мәжбүр итеү. *Юлдан тайпылдырыу.*

**ТАЙПЫЛЫУ** *к.* **1.** Барған тарафтан, йүнәлештән ситкә сығыу; тайшаныу. *Юлдан тайпылыу.* ■ *Малайҙар... арбаға юл биреп, ситкә тайпылды.* Я. Хамматов. *Күк толпар ҡапыл бер яҡҡа тайпылып, күҙҙән юғалды.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

2. *күсм.* Берәй уй-фекерҙән, эштәге төп йүнәлештән ситләшеү. *Егерменсе йылдар поэзияһында икенсе яҡҡа тайпылыу, шиғри статистика менән мауығыу күренештәре [осрай].* М. Кәрим.

**ТАЙПЫЛЫШ** *и.* **1.** Төп тараф, йүнәлештән йәки эш-хәлдән ситләшеү күренеше. *Айбулат үҙенең тормошон, ынтылыштарын бер идеалға буйһондор[ған], ситкә тайпылыштарҙы белмәй.* М. Минһажетдинов.

2. *күсм.* Партия тоткан төп йүнәлештән ситләшеү күренеше. *Уң тайпылыш.*

**ТАЙПЫЛЫШҺЫҘ** *р.* Төп тарафҡа, йүнәлешкә йәки эш-хәлгә ярашлы рәүештә. *[Нәзифә] врач ҡушҡандарҙың бөтәһен дә тайпылышһыҙ үтәне.* Я. Хамматов.

**ТАЙПЫЛЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **тайпылыу.** *Тап йөрәккә тейер пулялар ҙа тайпылышып теймәй үтәләр.* Р. Ниғмәти.

**ТАЙРА** *и.* Нәҫел-ырыу тарихы; шәжәрә. *[Эпкәләй:] Беҙҙең атай-олатайҙың тайраһы Ситдиҡ Сәхәбәгә барып тоташҡан.* Д. Юлтый.

**ТАЙРАН** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Осош.

□ **Тайран итеү** осоу. *Мәскәүҙән .. Себергә итер тайран.* М. Ғафури.

**ТАЙСА** *и.* Инә тай.

**ТАЙСАЛЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **тайшаныу** 1.

**ТАЙТ** *ымл. һөйл.* Йәшенгән ерҙән ҡапыл күренгәндә йәки күргәндә ҡысҡырып әйтелә.

♦ **Айт тигәнгә тайт итеү** *ҡар.* **айт.**

**ТАЙТОЯҠ** *и.* Ике өлөшлө үләндәр ғаиләһенә ҡараған, түңәрәк япраҡлы, ҡара ҡыҙыл ваҡ сәскәле, йөнтәҫ ҡыҫҡа һабаҡлы күп йыллыҡ урман үләне.

**ТАЙ-ТУЛАҠ** *и. йыйн.* Йәш йылҡы малы. *Һауын бейәләр генә әллә нисәмә өйөр, .. тай-тулаҡ иҫәпһеҙ күп була торғайны.* Н. Мусин.

**ТАЙФУН** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Көньяҡ-көнсығыш Азияла һәм Тымыҡ океандың көнбайышында була торған бик көслө диңгеҙ дауылы.

**ТАЙШАЙТЫУ** *ҡ.* Тайыш хәлгә килтереү, тайыш итеү. *Аяҡты тайшайтып баҫыу.*

**ТАЙШАЙЫУ** *ҡ.* Тайыш хәлгә килеү, тайыш булыу. *Ултырғыстың аяғы тайшайған.*

**ТАЙШАНДЫРЫУ** *ҡ.* Бер яҡҡа тайпылырға мәжбүр итеү; ялтандырыу. *Арҡа тайшандырыу.*

**ТАЙШАНЛАУ** *ҡ.* Тайшан-тойшан килеү, тайшан-тойшан итеү. *Тайшанлап атлау.* ■ *[Сәрбиямал] янбаштарын мыймылдатып, .. тайшанлап йөрөп ята.* З. Биишева.

**ТАЙШАН-ТОЙШАН** *окш.* Ян-яҡҡа аушан-таушан килгән хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Тайшан-тойшан атлау.* ■ *Буре, тайшан-тойшан баҫып, тал араһына инеп бара.* С. Кулибай.

**ТАЙШАНЫУ** *ҡ.* **1.** Төкөлмәҫ, бәрелмәҫ өсөн ситкә тайпылыу; янтайыу, ялтаныу. *Арҡа тайшаныу. Ситкә тайшаныу. Тайшанып ҡалыу. Юлдан тайшаныу.* ■ *Ҡара, ҡара! Тиҙерәк тайшан .. тапап һытмаһын.* М. Ғафури.

**2.** *күсм.* Берәй эштән йәки берәй хәлдән ҡасыу, ситләшеү. *Ямакаев яуаптан тайшанмаҡ булды.* Я. Вәлиев. / Алған төп йүнәлештән, фекерҙән ситләшеү, ҡарашты үҙгәртеү. *Коммунист-ғалим Ж. Кейекбаев принципиаль ныҡ кеше булды. Уңға-һулға тайшанмай, үҙ маҡсатына барҙы.* Ғ. Әмири.

**3.** *диал.* Тартыныу.

**ТАЙЫҘ** *с.* Сәсе, йөнө, ялы бик йоҡа, йәки бөтөнләй булмаған; таҡыр. *Тайыҙ баш.* ■ *[Бейәнең] ялы ла, ҡойроғо ла, маңлай сәсе лә булмай — тап-тайыҙ бер бейә була.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ТАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Баҫҡан, таянған ер шыма булып тотмау, шыуыу; шыйғалау. *Надя бер нисә ҡат тайып китте, ләкин йығылманы.* С. Агиш. / *күсм.* Дөрөҫ юлдан сығыу; яңылышыу. *Уйың тура, юлың урау булды, аҙмы тайҙың, аҙмы абындың.* М. Кәрим.

**2.** Төп урындан йәки йүнәлештән ситләшеү; тайпылыу. *Төн булғас, егет икенсе урынға тайып, ҡасып ята, ти* (Әкиәттән). *Күгәл генә өйрәк күлгә төшә, күлдән тайып, күрәнгә төшә* (Халыҡ йырынан). / *күсм.* Йәһәт кенә китеү; ысҡыныу. *[Вәлидов] Урта Азияға .. тайыу планын ҡора башланы.* А. Таһиров. *Баш иҫән сакта тайып ҡалырға кәрәк бынан, егеттәр.* М. Хәйҙәров.

**3.** Үҙ урынынан ҡуҙғалыу (быуынға ҡарата); кимәлйеү. *Аяғы тайған. Быуын тайҙы.*

**4.** *күсм.* Сығанаҡ килештәге исемдәр менән килеп, физик йәки рухи көс һәләтен юғалтыуҙы белдергән һүҙбәйләнеш яһай. *Бәҫтән тайыу. Иҫтән тайыу. Хәлдән тайыу. Һуштан тайыу.* ■ *[Әбәй:] Ҡарыуҙан тайып ятҡан юҡ әле, әбейҙәр тигәс тә, бигерәк тағы!* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Күҙҙән тайыу** *ҡар.* **күҙ. Ситкә тайыу** *ҡар.* **сит** [1].

● *Сисенгән һыуҙан таймаҫ.* Мәҡәл.

**ТАЙЫШ** *с.* **1.** Тайған, тайып ҡыйшайған (аяҡ-ҡул, быуынға ҡарата). *Тайыш бармаҡ.* **Тайыш аяҡ** аяғының башын эскә баҫҡан кешегә әйтелә.

**2.** Бер яҡҡа ҡыйыш, ситкә янтайған. *Тайыш аяҡлы өҫтәл. // Таған тайыш тора. Тайыш баҫыу.*

**ТАЙЫШ-ТОЙОШ** *р.* Бер тегеләй, бер былай, ҡыйыш-мыйыш. *Тайыш-тойош баҫыу.*

**ТАЙЫШЫУ** *ҡ. диал.* Тайшаныу. *Ситкә тайышыу.; Эштән тайышыу.*

**ТАЙЯР** [*фарс.*] *с. кит.* Нимәлер эшләргә, үтәргә әҙер торған. *Тайяр булыу.* ■ *[Зариф:] Олуғ мәмләкәттең тайяр вә ғәҙел һалдаттары булығыҙ.* Н. Ҡәрип. *Аттар Айҙарҙың әмеренә һәр ваҡыт тайяр торған.* Ғ. Ғүмәр.

**ТАКЕЛА́Ж** [*рус.* ⟨*гол.*] *и.* **1.** *диңг.* Караптың йөк тейәү өсөн ҡулланылған бөтә төр арҡандары.

**2.** *махс.* Арҡан, сығыр, сынйыр кеүек нәмәләрҙән торған йөк күтәреү ҡорамалы.

**ТАКЕЛАЖСЫ** *и.* Такелажда эшләгән эшсе.

**ТАКИ** [*фарс.*] *терк. иҫк. кит.* Маҡсат һөйләмен теркәү өсөн ҡулланыла; «һын өсөн. *Ғалимдар хеҙмәтендә мөстәким ҡыл, таки ғүмеремдең сәрмаяһы елгә китмә[һен].* М. Өмөтбаев.

**ТАКРАР** *и. ҡар.* **тәкрар.**

**ТА́КСА** [1] [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Ниндәйҙер эш йәки нәмә өсөн билдәләнгән хаҡ; ныҡлы хаҡ. *Такса буйынса түләү. Такса ҡуйыу.*

**ТА́КСА** [2] [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Оҙон тороҡло, кәкре ҡыҫҡа аяҡлы сәүек эт тоҡомо.

**ТАКСАЛАУ** *ҡ.* Такса [1] ҡуйыу, әйберҙең баһаһын билдәләү; баһалау. *Нәмәне таксалау.*

**ТАКСА́ТОР** [*рус.*] *и.* Такса [1] ҡуйыусы, хаҡ билдәләүсе; баһалаусы.

**ТАКСА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *махс.* Такса [1] ҡуйыу, хаҡ билдәләү эше. *Таксация үткәреү.*

**2.** Урмандың күләмен һәм сифатын билдәләү эше.

**ТАКСИ́** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Таксометр күрһәткән хаҡты түләтеп, кеше йәки йөк йөрөтә торған

автомобиль. *Йөк таксийы. Маршрут таксийы. Такси менән барыу.*

**ТАКСИСТ** [*рус.*] *и. һөйл.* Такси шофёры.

**ТАКСОМЕТР** [*рус.*] *и.* Таксиҙа күпме юл үткәнен һәм күпме түләргә кәрәклеген иҫәпләүсе прибор.

**ТАКСОМОТОР** [*рус.*] *и. кар.* **такси.** *Таксомотор паркы.*

**ТАКТ**[1] [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* **1.** Музыкаль метрик берәмек, музыкаль тауыштарҙың билдәле бер үлсәмдәге әйтелеше. *Ике өлөштән торған такт.*

**2.** Ниндәй ҙә булһа эш-хәрәкәттәге ритм. *Бер тактка һалыу. Такт менән эшләү.*

**3.** *махс.* Ниндәй ҙә булһа механизмдың эш циклындағы бер өлөш.

**ТАКТ**[2] [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Эш-хәлдә, үҙ-ара мөнәсәбәттә сама белеү хисе; әҙәплелек. *Педагогик такт. Такт етешмәү.*

**ТАКТИК** [*рус.*] *и.* Тактика (1, 2 мәғ.) буйынса белгес.

**ТАКТИК** *с.* **1.** Тактикаға (1 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Тактик мәсьәлә. Тактик уйын.*

**2.** Тактикаға (2 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Тактик принцип. Тактик һығымта.*

**ТАКТИКА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* **1.** Һуғыш, бәрелеште әҙерләү, ойоштороу теорияһы менән практикаһын эсенә алған хәрби оҫталыҡ. *Ҡамау тактикаһы. Һөжүм тактикаһы.* / Һуғыш алымдарын өйрәткән фән. *Тактика курсын үтеү.*

**2.** Ижтимағи һәм политик көрәш саралары. *Маркс пролетариаттың синфи көрәш стратегияһы һәм тактикаһының иң мөһим принциптарын билдәләне.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 10 апрель.

**3.** *кусм.* Маҡсатҡа ирешеү өсөн үтәлгән төрлө алым һәм саралар. [*Йәнтимер — Салихҡа:*] *Һиндә, берҙән, тактика, икенсенән, аҡыл етешмәй.* С. Агиш.

**ТАҠ**[1] *и. иҫк. кит.* **1.** Көмбәҙ. *Хоҙаның яҙғанына сара бармы? Яҙылмыш ләүх әл-мәхфүз тигән таҡҡа.* Аҡмулла.

**2.** Тәхет. *Шулгән һарайға ингәс, батша урын күрһәткән .., таҡ янына ултыртҡан.* «Урал батыр».

**ТАҠ**[2] [*гәр.*] *с.* **1.** Икегә тигеҙ бүленмәгән (һанға ҡарата). *киреһе* йоп. [*Аҡъял батыр:*] *Һанаған сакта йондоҙҙар таҡ булһа, мин ауырыу булырмын, ә йоп булһа, иҫән булырмын* (Әкиәттән).

**2.** Яңғыҙ, ишһеҙ. *Таҡ булыу. Таҡ ҡалыу.*

● *Ғәйепһеҙ дуҫ эҙләмә — таҡ ҡалырһың.* Мәҡәл. *Алма сыбар ат булмаҫ, ир-егет таҡ булмаҫ.* Мәҡәл.

**ТАҠ**[3] *окш.* Ҡаты нәмә менән ҡатыға һуҡҡанда сыҡҡан һаңғырау тауышты белдергән һүҙ. *Таҡ итеп ҡалыу.*

**ТАҠА** *р. һөйл.* Бөтөнләй, шыпа, һис тә. *Таҡа юҡ. Таҡа белмәй. Таҡа күрмәй.* ■ *Беҙҙең Ҡолмәт таҡа һиҙмәй ҡалды ҡулаҡ тоҙағына төшкәнен.* Т. Йәнәби.

**ТАҠАЙ-ТОҠАЙ** *р. диал.* Саҡ-саҡ ҡына, әҙ-мәҙ. [*Әбей:*] *Таҡай-тоҡай булһа ла ҡул ҡуя беләм бит мин.* Һ. Дәүләтшина.

**ТАҠАЛАМА** *и. диал.* Талҡыш.

**ТАҠАЛТЫУ** *к.* Нимәнеңдер янына бик яҡын килтереү; терәтеү. *Өйгә таҡалтып келәт һалыу.*

**ТАҠАЛЫУ** *к.* Нимәгәлер бик яҡын килеү; терәлеү. *Өй артына таҡалып, ялангә ҡарай емеш-йәшелсә баҡсалары һуҙыла.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТАҠАУ** *к.* Нимәнелер бер-берейһенә бик яҡын килтереү; терәлдереү. *Таҡап бәйләү. Таҡап ҡуйыу.*

**ТАҠЛАУ** *к. һөйл.* Берәмләү, берәмекләү. *Таҡлап һалыу. Таҡлап әйтеү.*

**ТАҠЛЫҒЫУ** (таҡлыҡ*ғ*) *к. һөйл. кар.* **тағылыу** 2. *Кешегә таҡлығып йөрөү.*

**ТАҠЛЫҒЫШЫУ** *к. һөйл. урт. кар.* **таҡлығыу.** *Таҡлығышып йөрөү.*

**ТАҠМАЗА** *и.* Көйһөҙ әйтелә торған шаян эстәлекле еңел шиғри әҫәр (*мәҫ.* «Ике ҡылыс, бер ҡылыс, тышы еҙ, эсе көмөш. Көнгә ялтырап тора, дошман ҡалтырап тора. Бер һелтәп алдым, ҡынына һалдым»).

**ТАҠМАЗАЛАУ** *к.* Таҡмаза итеп әйтеү.

**ТАҠМАҠ** *и.* **1.** Халыҡ ижадының бер төрө: еңел ҡыҫҡа көйгә һалып йырлана торған музыкаль шиғри әҫәр. *Туй таҡмағы. Таҡмаҡ сығарыу. Таҡмаҡ әйтеү. Таҡмаҡҡа бейеү.* ■ *Ике ҡатын таҡмаҡ әйтеп, гармунға бейей башланы.* Д. Юлтый.

**2.** *һөйл.* Таҡмаза. *Сания гәрләнә, аптырағас, асыуы килгәндә генә әйтә торған таҡмағына керешә: «Ғүмәр, Ғүмәр, бесәй тырнар, эт күмәр.* С. Агиш.

♦ **Тәкәй таҡмағы** килешмәгән, мәғәнәһеҙ һүҙ.

**ТАҠМАҠЛАУ** *к.* **1.** Таҡмаҡ әйтеү. *Сәғиҙә таҡмаҡлап-таҡмаҡлап бейеп тә алды.* М. Тажи.

**2.** Һүҙҙәрҙе рифма, ритмға килтереп әйтеү. *Ямғыр саҡырып таҡмаҡлау.*

**3.** Төшөндөрөргә, күндерергә тырышып, бер үк һүҙҙе ҡабатлау. *Улдарым һарыла икеһе ике яҡлап: Улай булһа, әкиәт һөйлә! Әкиәт һөйлә! — ҡыҫҡыралар таҡмаҡлап.* Ғ. Байбурин.

**ТАҠМАҠЛАШЫУ** *к.* Ҡара-ҡаршы таҡмаҡ (1 мәғ.) әйтешеү.

**ТАҠМАҠСЫ** *и.* **1.** Таҡмаҡ (1 мәғ.) сығарыусы.

**2.** Таҡмаҡ (1 мәғ.) әйтеүсе.

**ТАҠТА** *и.* **1.** Бүрәнәне ике яҡлап ярып йәки юнып йоҡартҡан яҫы ағас. *Йоҡа таҡта. Яҫы таҡта. Оҙон таҡта. Шыма таҡта. Ҡарағай таҡта. Таҡта бысыу. Таҡта ярыу заводы. // Таҡта күпер. Таҡта ҡойма. Таҡта ҡумта.* ■ *Ҡарағай ҙа ҡапҡа, башы таҡта, сереп төшөр микән бер саҡта* (Халыҡ йырынан). / Нимәнеңдер шундай ағастан эшләнгән өлөшө. *Иҙән таҡтаһы. Урындыҡ таҡтаһы. Һандыҡ таҡтаһы. Өҫтәл таҡтаһы.* ■ *Йәнтимер .. йәшник таҡталарын ямаштырып, бер өҫтәл эшләне.* С. Агиш. **Түбә таҡта(һы)** өйҙөң эсен өҫтән ҡаплап төшәгән таҡта; түшәм.

**2.** Берәй ғәмәлгә яраҡлаштырылған шыма йөҙлө яҫы нәмә. *Иглан таҡтаһы. Табель таҡтаһы. Туҡмас таҡтаһы.* **Ҡара таҡта** хурлыҡ билдәһе итеп кешенең насар эш-ҡылығын яҙа торған махсус таҡта. **Ҡыҙыл таҡта** *йәки* **маҡтау таҡтаһы** маҡтау билдәһе итеп, кешенең яҡшы эш-ҡылығын яҙа торған махсус таҡта.

**3.** (*йәки* **класс таҡтаһы**) Уҡыу-уҡытыу эшендә аҡбур менән яҙа торған махсус яҫы ҡулайлама. *Имай таҡтаға аҡбур менән .. яҙып, Хаяттың хисап белемен тикшерҙе.* Һ. Дәүләтшина. **Таҡтаға сығыу** дәрес яуабын класс алдына, таҡта янына сығып һөйләү.

**4.** *с. мәғ.* Йоҡа ғына яҫы нәмә рәүешендәге. *Таҡта сәй. Таҡта таш.*

♦ **Күтәреү таҡтаһы** киндер һуҡҡанда биҙәккә бүленгән буйлыҡты күтәреп арҡау атыу өсөн ҡулланылған 10-15 см яҫылығындағы йоҡа шыма таҡта. **Таш таҡта** таш ҡәләм менән яҙа торған йоҡа ғына ҡара таш.

**ТАҠТАБАШ** *и. диал. ҡар.* **кәштә** 1.

**ТАҠТАТАШ** *и.* Берәй ваҡиға йәки атаҡлы кешенең иҫтәлеген мәңгеләштереү маҡсатында яҙыу яҙып ҡуйылған йоҡа таш; мемориаль таҡта. *Уҡыусылар талабы буйынса яҙыусы [Сәғит Мифтахов] йәшәгән йортҡа таҡтаташ ҡуйылды.* «Ағиҙел», 1957, № 2.

**ТАҠ-ТОҠ, таҡ та тоҡ** *окш.* Ҡабат-ҡабат таҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Таҡ та тоҡ итеү. Таҡ та тоҡ килеү.* ■ *Таҡ-тоҡ утын ҡырҡырмын, ҡырҡып бөткәс килермен* (Әкиәттән).

**ТАҠ-ТУҠ, таҡ та туҡ** *окш. ҡар.* **таҡ-тоҡ.** *[Зәки ағай] таң аттымы, уяна ла таҡ та туҡ ағас юна.* Ф. Мөхәмәтйәнов.

**ТАҠТЫРЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **тағыу.** *Бауҙы оҙон таҡтырыу. Сулпы, мәрйен таҡтырыу. Ҡыңғырау таҡтырыу.*

**ТАҠҺЫУ** *к. диал. ҡар.* **тасҡау** 1. *Май таҡһыу.*

**ТАҠЫЛДАТЫУ** *к.* Таҡ-тоҡ иттереү, таҡ-тоҡ килтереү.

**ТАҠЫЛДАУ** *к.* **1.** Таҡ-тоҡ итеү, таҡ-тоҡ килеү, таҡ-тоҡ иткән тауыш сығарыу. *Мылтыҡ тауыштары ишетелде. Ҡайҙалыр пулемёт таҡылданы.* С. Ханов. *Ҡапыл тышта ат тояҡтарының таҡылдауы .. ишетелде.* Я. Вәлиев.

**2.** *һөйл.* Уйнау (һуйырға ҡарата). *Яҙ көндәрендә ҡорҙарҙың көтөрләүе, һуйырҙарҙың таҡылдауы яңғырап тора.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 2 июль.

**3.** *ҡусм.* Бер үк һүҙҙе туҡыу, туҡтауһыҙ һөйләү. *Зәмзәмбикә мине генә көткән һымаҡ, тағы шул турала таҡылдарға тотонды.* Д. Исламов. *[Хәлкәс:] Етте, таҡылдама инде. Әйттем бит, вәғәҙә, тинем.* Ш. Бикҡол.

**ТАҠЫЛДАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **таҡылдау.** *Бисәләр бер юлы үҙ-ара таҡылдаша башланылар.* Б. Бикбай.

**ТАҠЫМ** *и.* **1.** Боттоң сат яғындағы һум ите; сат ите.

**2.** Ыштан балағының бот төбөнә индерелгән ҡыйығы. *Таҡым ҡуйып тегеү.* / *ҡусм. һөйл.* Ыштан.

● *Таҡымлы кеше аттан ҡоламаҫ.* Әйтем.

**ТАҠЫР** *с.* **1.** Тип-тигеҙ булып, тапалып йәки кибеп ҡатҡан; ҡаҡ. *Таҡыр ер. Таҡыр юл.* // *Ҡара таҡыр.* ■ *Кәртәнең өй тирәһендәге әйләнәһе генә ҡара таҡыр булып тапалған.* Һ. Дәүләтшина. *Һеперелә юлдар ҡурала таҡыры ялт итеп ҡалғансы.* Х. Ғиләжев.

**2.** Үҫемлек булмаған йәки бер ни менән дә ҡапланмаған; ҡаҡ. *Таҡыр түбә. Таҡыр тау башы.* // *Таҡырға ҡалдырыу.* ■ *Минең эш ҡояш сыҡҡан ваҡытта таҡыр баҫыуҙағы атты алып ҡайтыу менән башлана.* М. Ғафури. / *һөйл.* Сәсе алынған, таҙа итеп ҡырылған. *Таҡыр баш. Сәсте таҡыр итеп алдырыу.* ■ *Йүгән тотоп атҡа китеп бара таҡыр башлы башҡорт малайы.* М. Илбаев.

**3.** *ҡусм.* Кәрәгенән әҙ, тейештән кәм; етешһеҙ, наҡыҫ. *Аҡылға таҡыр. Ашау яғы таҡыр. Белем яғы таҡыр. Кеҫә яғы таҡыр.*

♦ **Ҡолон таҡыры** *диал.* елелек.

● *Аҡса баҡыр, иҫәпләһәң — таҡыр.* Мәҡәл.

**ТАҠЫРАЙТЫУ** *к.* **1.** Яланғасландырыу, таҡырға әйләндереү. *Күк дүнән аяҡ аҫтындағы үләнде йөрөп ашай торғас, тау башын таҡырайтып, ҡаҡҡа әйләндереп бөткән.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** *ҡусм.* Нык кәметеү, әҙәйтеү. *Иҫәпһеҙ тотоноп, аҙыҡты таҡырайтыу.*

**ТАҠЫРАЙЫУ** *к.* **1.** Тапалып йәки кибеп ҡатыу; таҡырға әйләнеү; таҡырланыу. *Һуҡмаҡ таҡырайғандай булды. Күрәһең, бында күберәк йөрөйҙәрҙер.* Ә. Бикчәнтәев.

**2.** Өҫтөндәге үҫемлеге йәки бүтән нәмәһе бөтөп, яланғасланыу; таҡырға әйләнеү, таҡырланыу. *Тау итәге таҡырайып ҡалған, әрһеҙ селек менән түбылғы ла бөткән.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 14 апрель.

**3.** *ҡусм.* Бөтөр сиккә етеү, нык әҙәйеү. *Юлға алып сығылған аҙыҡ-түлек таҡырайғайны.* Ғ. Ибраһимов.

**ТАҠЫРЛАНЫУ** *к.* **1.** Тапалып йәки кибеп ҡатыу; таҡырға әйләнеү; таҡырайыу. *Ауылдар ҙа күренмәй, таҡырланып бөткән юлы ла юҡ, ҡайҙа барғаныңды белмәйһең.* Т. Йәнәби.

**2.** Өҫтөндәге үҫемлеге йәки бүтән нәмәһе бөтөп, яланғасланыу; таҡырайыу. *Көтөү йөрөгән болондар таҡырланып ҡалды.*

**3.** *ҡусм.* Бөтөр сиккә етеү, нык әҙәйеү; таҡырайыу. *Яҙға табан бесән таҡырланды.*

**ТАҠЫРЛАУ** *к.* **1.** Тапап, шымартып ҡатырыу; таҡырға әйләндереү. *Ырҙын табағын таҡырлау. Юлды таҡырлау.*

**2.** Өҫтөндәге үҫемлеген йәки бүтән нәмәһен бөтөрөп, яланғаслау; таҡырға әйләндереү. *Таҡырлап һеперeү. Машина йөрөп, урамды таҡырлап бөткән.*

**3.** *ҡусм.* Бөтөр сиккә еткереү, нык әҙәйтеү. *Ғариф .. табындаштарын [һүҙ менән] ауыҙына ҡаратып ҡуя ла, ултыртылған һыйҙы бер үҙе таҡырлап ташлай.* Б. Бикбай.

**ТАҠЫР-ТОҠОР** *окш.* Ҡаты нәмә ҡаты, ҡытыршы әйбергә тейеп барғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Таҡыр-тоҡор итеү. Ағас күперҙән таҡыр-тоҡор килеп арба үтте.*

**ТАҠЫ-ТОҠО** *р. һөйл.* Тейешле күләмдән нык кәм; етер-етмәҫ. *Таҡы-тоҡо ғына ашау. Таҡы-тоҡо ғына белеү.* ■ *[Байрас:] Ҡыш оҙон. Был иген таҡы-тоҡо ғына булып ҡалыр әле.* З. Биишева. *Минең белем яғы ла таҡы-тоҡо.* Т. Килмөхәмәтов. *Уҡыуҙан .. йүгереп ҡайтабыҙ ҙа, таҡы-тоҡо ғына ашап, .. һуғыш уйыны уйнайбыҙ.* Н. Иҙелбай.

**ТАҠЫЯ** *и.* Ирҙәрҙең түбә өҫтөнә генә кейә торған йоҡа, түңәрәк баш кейеме. *Бәрхәт таҡыя. Бохар таҡыяһы. Ҡара таҡыя.* ■ *[Әмирханов-*

*тың] башында һәр мөйөшө тегеҙ бөгөлгән ука менән сигелгән үзбәк такыяһы.* С. Агиш. / Ҡыҙҙарҙың мәрйен-тәңкә менән биҙәлгән баш кейеме. *Шиғырҙа .. китәсәк кыҙҙың һакал менән такыяһын, тубый, кашмауға алмаштырыу гәҙәте ентекләп хикәйә ителгән.* Ә. Харисов.

♦ **Таҡыя баш** көпшә һабаҡлы, сатыр сәскәле үләндәрҙең башы. *Такыя башлы кырлы курай.* ■ *Такыя баш курайҙар урманда үҫә икән* (Халыҡ йырынан).

**ТАҠЫЯБАШ** *и.* Лютиктар ғаиләһенә ҡараған, күкһел алһыу сәскәле болон үләне. *Такыябаш сәскәһе.*

**ТАЛ** *и.* Һыу буйында үҫә торған тар оҙон япраҡлы, көсөк сәскәле ҡыуаҡ ағас. *Йәш тал. Тал бөрөһө. Тал сыбығы. Тал япрағы.* ■ *Бөгөлөп кенә һығылып үҫә икән һыу буйкайҙарының талдары* (Халыҡ йырынан). **Аҡ тал** аҡһыл ҡабыҡлы, аҡһыл япраҡлы тал. **Бөҙрә тал** *шигр.* ботаҡтары суҡланып һалынып торған талға әйтелә. *Йәш камышлы тәрән күл ситендә һыуға ятып бөҙрә тал үҫә.* Ҡ. Даян. **Кәзә талы** йомшаҡ, шыйыҡ тал. **Ҡара тал** ҡара һор ҡабыҡлы эре тал. **Ҡоба тал** ҡабығы ҡубырсып торған аҡһыл күрән төҫтәге тал. **Ҡыҙыл тал** ҡара ҡыҙыл ҡабыҡлы тал. **Ҡырсын талы** *кар.* **кәзә талы. Мурт тал** ваҡ япраҡлы, аҡһыл йәшел ҡабыҡлы, мурт сыбыҡлы тал. **Суҡ тал** суҡланып төшөп торған ваҡ ботаҡлы тал. **Һары тал** һары ҡабыҡлы йомшаҡ тал.

♦ **Тал ҡарағаты** *кар.* **ҡарағат.**

**ТАЛАЙ** *с.* Арыу уҡ, күп кенә, байтаҡ. *Талай вакыт үтте. Талай ер киттек.* ■ *Матур йөҙлө, аҫыл һөйәк, сос егеткә талай кыҙҙар ғашиҡ булып бораңланы.* «Бабсаҡ менән Күсәк». **Бер талай** бер ни тиклем, бер аҙ. *Бер талай вакыт. Бер талай халык. // Бер талай көтөп тороу.* ■ *Ағаһы мығыр-мығыр илаулап кына тағы кустыһының тоғона бер талай аҙык һалды.* Б. Бикбай. *Шул курайҙы алып тарттыниһәң, кайғы--хәсрәт баҫыла бер талай* (Халыҡ йырынан).

**ТАЛАҠ** [1] *и.* Умыртҡалы йән эйәләренең ҡан эшләүҙә, матдә алмашыуында ҡатнашҡан эске ағзаһы. *Талак шешеү.*

♦ **Күк талаҡ итеү** ныҡ туҡмап, тотош күк итеү. *Күк талак итеп тукмап ташлау.* **Сар талаҡ** үҙ һүҙле, ҡарышҡаҡ, еңмеш. *Сар талак кеше.* **Талағын күпсетеү** *кар.* **күпсетеү. Талаҡ ташыу** асыу ҡабарыу, ныҡ асыу килеү. *[Кәмәр] талағы ташып, .. нишләргә белмәй, кара көйөп йөрөнө.* Т. Йәнәби.

**ТАЛАҠ** [2] *и.* **1.** Йылҡы йәки һыйыр малының эсен сәнсеү алып ауырыуы (эҫеләй эсереүҙән, насар ашатыуҙан, артыҡ шәп йөрөтөүҙән һ. б. була).

**2.** *диал. кар.* **талау** [2].

**ТАЛАҠ** [3] [*ғәр.*] *и.* Шәриғәт буйынса, ирҙәрҙең ҡатын айырыуы. *Талак эше.* ■ *— Миңә, наҙан кешегә, талак нисек вә хәләг нисек икәнен мулла баян итмәне.* М. Өмөтбаев. **Баян талаҡ** ҡатынды бөтөнләй айырып ебәреү, кире алыу мөмкинлеге булмаған талаҡ. **Талаҡ хаты** (*йәки* **ҡағыҙы**) айырыуҙы, айырылышыуҙы белдергән ҡағыҙ. *[Мырҙаш] йәш кәләш менән кауышыу көндәре якынайғас, өйөнә мулла сакырҙы, Сәлихаға талак кағыҙы бирҙе.* Д. Юлтый. / Шәриғәт буйынса, ҡатын айырғанда ирҙең әйтә торған һүҙе (шаһит алдында ир өс ҡат «талаҡ» тип ҡысҡырһа, ҡатын айырылған була). *Талак әйтеү.* ■ *[Зиннәт Фатимаға:] Вон! Бөтә нәмәләреңде калдыр ҙа куҙемдән юғал. Талак! Һин минән талак.* Х. Ибраһимов. **Хәрәм талаҡ** өс тапҡыр әйтелгән талаҡ.

□ **Талаҡ итеү** (*йәки* **ҡылыу**) айырыу (ҡатынды). *Дәүләт мулла йәш бисәһен талак итеп, урамға сығарып ташлаған.* Н. Ҡәрип.

**ТАЛАҠ** [4] *и. иҫк.* Кешене йәки илде талау өсөн яһалған баҫҡын.

**ТАЛАҠЛАУ** [1] *к.* Талаҡ [2] булып ауырыу (малға ҡарата). *[Хәлкәс:] Арғымағыңдың тире ката төшһөн. Эҫелә талаклап куйыуы бар.* Ш. Бикҡол.

**ТАЛАҠЛАУ** [2] *к.* Талаҡ [3] әйтеп айырыу (ҡатынды). *Һуңғыһы булһын юғиһә, үҙеңде ғүмерлеккә талаклармын.* Д. Исламов.

**ТАЛАН** *и. иҫк.* Бәхет, уңыш. *Талан булыу.*

**ТАЛАНТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Билдәле бер эшкә кешенең тәбиғәтенән килгән ҙур булдыҡлылыҡ; һәләтлек. *Артистик талант. Әҙәби талант. Талант эйәһе.* ■ *Һиндә бар изге теләк, изге күңел, якшы талант.., һин шуларҙы эшкә куйһаң — ысын шағирһың — иттем ант!* М. Ғафури. *Талантлың асылы — халыкка халыкса хеҙмәт итеү.* Ә. Вахитов.

**2.** Ҙур һәләткә эйә шәхес, һәләтле кеше. *Ауыл таланттары. Йәш талант.* ■ *Ысын, ҙур таланттар ғына .. үлемһеҙ ғүмер таба.* Р. Шәкүров.

**ТАЛАНТЛЫ** *с.* Таланты (1 мәғ.) булған, ныҡ булдыҡлы, һәләтле. *Талантлы актёр. Талантлы шағир.* ■ *Һәр сак ғашиҡ талантлылар таланттарға.., тарһыныуҙар ят уларға.* Ҡ. Даян. *Талантлы кеше башкалар күрә алмағанды күрә белә.., ябай ғына әйбер аша бөйөк әһәмиәткә эйә булған асыштар яһай.* К. Әхмәтйәнов.

**ТАЛАНТҺЫҘ** *с.* Таланттан (1 мәғ.) мәхрүм, һәләтһеҙ.

**ТАЛАНҺЫҘ** *с. иҫк.* Бәхетһеҙ.

**ТАЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **талау** [1]. *Әттән таланыу.* ■ *6 октябрҙә Совет хөкүмәте актарҙан таланған башкорттарға ярҙам итеү хакында карар кабул иткән.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТАЛАП** [*ғәр.*] *и.* **1.** Үтәлеше мотлаҡ итеп ҡуйылған ҡәтғи һорау. *Талап куйыу. Талапты үтәү.* ■ *[Эшселәр] эш ташлай ҙа, хужалары алдына үҙҙәренең ... талаптарын куя.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Кем йәки нимәгәләр ҡарата ҡуйылған норма, шарттар. *Агрономик талап. Эш талабы. Технологик талаптар. Вузға инеүселәргә куйылған талаптар.* ■ *Укымайса булмай. Вакыт уҙған һайын алға барабыҙ, бурыстар катмарлана, талап ҙурая.* Б. Бикбай.

**3.** Кем йәки нимәгәләр ҡарата ҡуйылған ҡағиҙә рәүешендәге шарт. *Закон талабы. Мода куйған талаптар.* ■ *Фольклор әҫәрҙәрен яҙып алғанда куҙҙә тотолорға тейешле .. төп талап — һөйләүсенең бер һүҙен дә, хатта бер өнөн дә боҙмай яҙып алыу.* Ғ. Амантай.

**4.** Тормош шартынан килгән теләк; ихтыяж. *Культура талабы.*

□ **Талап итеү** (*йәки* **ҡылыу**) **1)** хәл ителешен, үтәлешен ҡәтғи рәүештә һорау. *[Председатель:] Хөкүмәт тә .. райком да минән икмәк талап итә.* М. Тажи; 2) үтәлеше мотлаҡ булған шарт ҡуйыу. *Ниндәй юл тоторға? — Бына шул турала уйланырға кәрәк. Бөгөнгө хәл шуны талап итә.* Д. Юлтый.

**ТАЛАПҠАР** [*гәр.* ⟨ *фарс.*] *с. иҫк. кит.* Талап итеүсе.

**ТАЛАПСАН** *с.* Ныҡ талап итеүсән, талапты ҡаты ҡуйыусан. *Талапсан етәксе. Талапсан булыу.* ■ *Ҡорт инәһе — ил башлығы — бик талапсан. Ул бөтөнләй таҙа, төҙөк ояға ғына бала һала.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТАЛАПСАНЛЫҠ** *и.* Талап итә белеү сифаты, ҡуйған талапты еренә еткереү һәләте. *Юғары талапсанлыҡ.* ■ *Юҡ, талапсанлыҡ етешмәй. Колхоз тормошо һаман да элеккесәрәк аға, үҙгәреш юҡ.* Р. Низамов. *Талапсанлыҡ һәм ойошҡанлыҡ.., тапшырылған эш өсөн яуаплылыҡ — тормош талабы.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 4 декабрь.

**ТАЛАПСЫЛ** *с. диал. ҡар.* **талапсан.**

**ТАЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **талау** [1]. *Элек баярҙар кешене эшкә сыҡмаған өсөн эттән талатҡан, ти.* М. Тажи.

**ТАЛАУ** [1] *к.* **1.** Бирмәҫкә тырышҡан кешенән нәҙәләре көслөк менән тартҡылау. *Талап алыу.* ■ *[Заятүләк] арт яғына ҡараһа, ҡыҙҙар менән шаярып, бергә ҡолон бәйләгән, ылышҡа ҡорот йәйгән ҡыҙҙарҙан ҡорот талаған .. йәйләү тора алдында.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». / Көслөк менән тартып алыу. *Ауылдан үткән .. бандиттар Өмөтбайҙың тауыҡтарына тиклем талап киткән.* Ғ. Дәүләтшин. *Урмандарҙа ҡараҡ бар. Урман уҫал — төнөн уҙыусының ат һәм тунын талап ҡайтара.* Ғ. Сәләм.

**2.** Ирекһеҙләп, көсләп, мал-мөлкәтен алыу. *Илде талау. Магазинды талау. Талап йыйған мал.* ■ *Абдулла ахун халыҡ талап, илде ҡалдырҙы йотҡа* (Халыҡ йырынан).

**3.** Ирекһеҙләү, көсләү. *Ҡыҙҙы талау. Талап үбеү.*

**4.** Һөжүм итеп йәки күмәк ябырылып, төрлө урындан тешләү. *Бүре талаған. Себен талай.* ■ *Балыҡҡа йөрөгәндә .. мине серәкәй талай торғайны.* Д. Юлтый. / *күсм.* Туҡтауһыҙ тиргәү, тынғы бирмәй әрләү. *[Гөлйөҙөм:] Күҙенә салыныр хәл юҡ — ... тота ла талай, тота ла бәйләнә.* Я. Вәлиев.

♦ **Йөрәкте талау** күңелде өйкәп тынғы бирмәй уйландырыу. *Ҡатын кешенең тәүге мөхәббәте бер ҙә иҫенән китмәй, гел йөрәген талай.* Б. Бикбай. **Эт талағыр** әрләгәндә, һүгенгәндә әйтелә.— *Онотоп ебәрелгән бит, эт талағыр.* М. Тажи.

● *Күрәсәгең булһа, күркә талап үлтерә.* Мәҡәл.

**ТАЛАУ** [2] *и.* Малда була торған бик йоғошло яман шешек; түләмә. *Үткән йәй .. талау сиренән, бик күп йылҡы үлеп, Арыҫландың яраулы аттары кәмегәйне.* Ғ. Ибраһимов. / Әрләгәндә әйтелә. *Ҡуңыр боға һәү-һәү, ҡайҙа бараһың, талау* (Халыҡ йырынан).

**ТАЛАУЛАУ** *к.* Талау [2] йоғоп ауырыу. *Талаулап үлгән ат.*

**ТАЛАУҺЫРАУ** *к. диал. ҡар.* **талаҡлау** [1].

**ТАЛАШ** *и.* **1.** Үҙ-ара ниҙер дәғүәләшкән ғауға, тартыш. *Талаш сығыу.* ■ *Барыһы ла [башлыҡ] мин булам да мин булам, ти икән. Киткән шау-шыу, талаш* (Әкиәттән).

**2.** Үҙ-ара әйтешеү, әрләшеү; ыҙғыш. *[Ҡаһымбай — Буранбайға:] Бындағы кеүек бисәләрҙең талашын тыңлап, уларҙың ошағы арҡаһында бригадирҙан таланып .. йөрөмәйһең.* И. Ғиззәтуллин.

**ТАЛАШЛЫ** *с.* Талаш, бәхәс уятҡан; дәғүәле, бәхәсле. *Әштең ҡораллы бәрелешкә тиклем барып етеү мөмкинлеге, улар араһындағы ҡайһы бер талашлы мәсьәләләрҙе лә ситкә ҡуйып торорға мәжбүр итте.* И. Насыри.

**ТАЛАШ-ТАРТЫШ** *и. йыйн.* Үҙ-ара әрләшкән, дәғүәләшкән ғауға; ыҙғыш. *Талаш-тартыш сығарыу.* ■ *Талаш-тартышты бөтөрөп, тыныс ҡына торорға тырышайыҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**ТАЛАШТЫРЫУ** *к.* **1.** Үҙ-ара әрләшергә, дәғүәләшергә мәжбүр итеү.

**2.** Үҙ-ара һуғыштырыу (ҡош-ҡорт, йәнлекте). *Эттәрҙе талаштырыу.*

● *Бар яраштырыр, юҡ талаштырыр.* Мәҡәл.

**ТАЛАШЫУ** *к.* **1.** Үҙ-ара нимәгәләр дәғүәләшеү; тартышыу. *Ер өсөн талашыу. Урын өсөн талашыу.* ■ *[Әбей — егеткә:] Унда бер ҡыптыр тунға талашып ятҡан әбей менән бабай булыр* (Әкиәттән).

**2.** Үҙ-ара әрләшеп, ҡысҡырышыу; ыҙғышыу. *Зыҡ ҡубып талашыу. Талашып йәшәү.* ■ *[Новиков:] Беҙ Индрил менән талашып киттек. Бик ауыр һүҙҙәр әйтештек.* Д. Юлтый.

**3.** Үҙ-ара һуғышыу (ҡош-ҡорт, йәнлеккә ҡарата). *Айғырҙар талашҡанын күргәнегеҙ бармы?.. Өйөр эсендә талашмай улар. Баҫтырышып бер ситкә — аулаҡҡараҡ сығалар..* Н. Мусин. *Йыуынды һыу түккән ерҙә .. эттәр талаша.* Ғ. Ғүмәр.

♦ **Ең-яға килеп талашыу** бик ныҡ талашыу. **Йән талашыу** *ҡар.* **йән. Ҡан талашыу** нимәгәләр ирешергә, өлгәшергә бик ныҡ тырышыу. *Ҡыҙыл ғәскәр унда ҡан талаша аҡ эттәрҙе илдән ҡыуырға.* Б. Ишемғол. **Ҡыр талашыу** теләләшеү, ҡаршылыҡ күрһәтеү, ныҡ тартышыу. *Бармайым тип ҡыр талаша.* ■ *[Тимерсе] киреләнә башланы. Уны ҡыр талашып ҡына еңеп булмаҫ .. тинем.* М. Тажи.

● *Ағай-эне талашыр, атҡа менһә, ярашыр.* Мәҡәл. *Ике ҡарға талашһа, уҡсыға — йөн.* Мәҡәл.

**ТАЛБАУҺЫУ** *к. диал.* Әлһерәү. *[Ҡуҙыйкүрпәс] талбауһып үлем көтөп ятҡанда ғына бер һары турғай суҡ тирәк башына ҡуныр һайрай башланы.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ТАЛҒАҠ** *и. диал.* Таҙғаҡ.

**ТАЛҒАТАУ** *к. диал. ҡар.* **талымлау** 1.

**ТАЛҒАУҺЫҘ** *с. диал. ҡар.* **талымһыҙ** 1.

**ТАЛҒЫН** *с.* **1.** Яй ғына, бер көйгә тигеҙ рәүештә барған; һалмаҡ. *Талғын аҙым. Талғын хәрәкәт. // Талғын атлау. Талғын ғына ағыу. Талғын юртҡан ат.* ■ *Машина гел бер төрлө талғын, йоҡо килтергес тауыш менән әйләнә лә*

*эйләнә.* К. Мәргән. *Ниндәй еңел беҙгә ышеү бергә, ағын һыу ҙа талғын тойола.* Р. Ғарипов. / Әкрен иҫкән, йомшаҡ. *Иртәнге талғын ел.* // *Талғын ғына ел иҫә.*

**2.** Ҡыҙыу булмаған, йомшаҡ; тандыр. *Талғын мунса.* // *Талғын ғына яныу.* ■ *Мейестән талғын йылы бәрә.* Б. Бикбай. *Һауа саф, дымлы. Көндөҙгө ҡояш талғын ғына йылыта.* Д. Исламов.

**ТАЛҒЫНЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Әкренәйә, тыныслана төшөп, талғынға әйләнеү; талғын булыу. *Йылғаның ағымы талғынланды.*

**2.** Һүрәнләнеп йомшарыу (ҡыҙыулыҡҡа, эҫегә ҡарата). *Көн аҙағында һауа талғынланды.* Ш. Шәһәр.

**ТАЛҒЫНЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** Хәрәкәтен, барышын әкеренәйтеп талғынға әйләндереү; талғын итеү. *Хәрәкәтте талғынлатыу.*

**2.** Ҡыҙыулыҡты, эҫелекте кәметеп талғынға әйләндереү; талғын итеү. *Еләҙлек көн эҫелеген талғынлата.*

**ТАЛҒЫНЛЫҠ** *и.* **1.** Яй, талғын булғанлыҡ, һалмаҡлыҡ. *Талғынлыҡ хәрәкәттә, йөрөүҙә генә түгел, һөйләшеүҙә лә һиҙелә.* С. Агиш. / Тынып, тын торған хәл. *Талғынлыҡҡа бирелеү.*

**2.** Ҡыҙыулыҡтың һүрелеүе, йомшаҡлыҡ. *Кискә талғынлыҡ.*

**3.** *күсм.* Йән, тән тойған тыныслыҡ, ләззәт. *Тәнгә рәхәт талғынлыҡ биреп һалҡынса ел иҫте.* Б. Бикбай.

**ТАЛҒЫР** *с. диал.* Тарғыл. *Талғыр йылан. Талғыр һыйыр.*

**ТАЛҒЫУ** *ҡ.* Яй ғына, тигеҙ генә хәрәкәт итеү. *Талғып аҡҡан йылға.* ■ *Беҙ поезда китеп барабыҙ, талғып күтәрелгән ҡараңғы төн тәҙрәләрҙән эскә ҡараны.* Ғ. Сәләм.

**ТАЛДЫРЫУ** [1] *ҡ.* Хәлһеҙләндереү, арытыу (берәй ағзаны). *Күҙ талдырып ҡарау.* ■ *Әҙләй-эҙләй ҡаңғырҙым, аяҡтарым талдырҙым* (Халыҡ йырынан).

**ТАЛДЫРЫУ** [2] *ҡ.* Онотолорға, ниндәйҙер хәлгә бирелергә мәжбүр итеү. *Йоҡоға талдырыу. Уйға талдырыу.*

**ТАЛИҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Йондоҙ.

**2.** *күсм.* Бәхетле яҙмыш.

**ТАЛИҒА** [*ғәр.*] *и.* **1.** *кар.* **талиғ** 2. // *Талиғаһыҙ баш.*

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

● *Бәхет булһа, талиға кәрәкмәй.* Мәҡәл.

**ТАЛИП** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Мәҙрәсә шәкерте. *Талиптар менән уҡығанда тауышыбыҙ айырылды* (Бәйеттән).

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ТАЛИР** [*рус.* талер ⟨ *нем.*]: **талир тәңкә** **1.** Боронғо бер һумлыҡ көмөш аҡса. *Мәҙрәсәгә килеп ингәс, хәйер бирҙек бер талир* (Бәйеттән).

**2.** Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының кейеменә биҙәүес рәүешендә баҫылған ошо аҡса. *Талир тәңкәле сулпы. Талир тәңкәгә бөткән ҡашмау. Алтынға манылған талир.* ■ *Сәсүрмәгә талир тәңкә таҡҡан алһыу йөҙлө иркә әсәм юҡ.* Ғ. Амантай.

**ТАЛИСМА́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. кит.* Хөрәфәт буйынса, кешегә бәхет килтерә һәм төрлө бәлә-ҡазанан һаҡлай торған нәмә. *Талисман итеп йөрөтөү.*

**ТАЛҠАН** *и.* Ҡыҙҙырған бойҙай оно. *Талҡан тартҡан — түгел әле тирмәнсе.* Й. Солтанов. / Шул ондан ҡайнар һөткә йәки һыуға болғатып, май ҡушып яһаған ашамлыҡ. *Талҡан бешереү. Талҡан болғатып алыу.*

◆ **Талҡан итеү** һүгып, ҡыҫып онтау; ҡыйратыу.

**ТАЛҠЫ** *и.* Кипкән етен, киндерҙе иҙеп, сүсен айыра торған ҡорал. *Талҡы .. онтаҡлай киндерҙең талҡышын.* С. Ҡудаш. *Талҡы менән етен талҡып, талалыр беләктәрем* (Халыҡ йырынан).

**ТАЛҠЫТЫУ** *ҡ. йөкм. кар.* **талҡыу** 1. *Киндер талҡытыу.*

**ТАЛҠЫУ** *ҡ.* Сүсен айырыу өсөн етен, киндерҙе талҡыға ҡыҫып иҙеү. *Етен талҡыу.* ■ *Көҙ көндәре ҡыҙҙар һыу буйына киндер талҡырға йыйыла торғайны.* С. Агиш.

**ТАЛҠЫУЫС** *и. диал.* Талҡы.

**ТАЛҠЫШ** *и.* Етен, киндерҙең талҡынан үткәргәндә сыҡҡан сүбе. *Етен талҡышы. Киндер талҡышы.* ■ *Бер бригада киндер талҡыһын икенсеһе шул сүстәрҙе .. әҙерләһен, ҡағып талҡышын.* С. Ҡудаш.

**ТАЛҠЫШЛАНЫУ** *ҡ.* Бик ныҡ иҙелеп ваҡланыу. *Талҡышланған һалам.*

**ТАЛҠЫШЫУ** *ҡ. урт. ярҙамл. кар.* **талҡыу** 1. *Етен талҡышыу.*

**ТАЛЛЫҠ** *и.* Тал күп үҫкән ер. *Талға баҫып, таң турғайы һайрай таллыҡта.* Т. Йәнәби.

**ТАЛМА** *с. диал.* Арымтал.

**ТАЛМА́С** *и. кар.* **тылмас.**

**ТАЛО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Нимәлер алыу, ҡайҙалыр инеү хоҡуғы биргән ҡағыҙ. *Бензин талоны. Врач талоны.*

**2.** Документтың кенәгә төбөндә ҡалған ише. *Ордер талоны. Путёвка талоны.*

**ТАЛПАН** *и.* **1.** Йән эйәләренең тәненә ҡаҙалып ҡан һура торған, быуынтыҡ аяҡлы ваҡ бөжәк. *Энцефалит талпаны. Талпан ҡаҙалыу.* ■ *Талпан кеше өсөн үтә ҡурҡыныслы бөжәктәрҙең береһе.., ул энцефалит ауырыуының микробтарын йоҡтороуы мөмкин.* В. Ғүмәров.

**2.** *һөйл. кар.* **бет** 2.

**3.** *кар.* **бетсә** 1.

**ТАЛПАНЛАУ** *ҡ.* Талпан (1 мәғ.) һырыу, талпанлы булыу. *Талпанлаған эт.*

**ТАЛПЫНДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡағып елпетеү (ҡанатты). *Ҡор ҡанаттарын талпындырҙы ла, йән бирҙе.* Я. Хамматов.

**2.** *күсм.* Хис-теләк менән ашҡындырыу. *Шиғыр килде күңелемә ялҡын булып, уятты ул йөрәгемде, талпындырҙы.* К. Мәргән.

**ТАЛПЫНЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡанат елпеп ынтылыу (ҡошҡа ҡарата). *Талпынып осҡан ҡош. Осорға талпыныу.* ■ *Ҡамыш араһында, бер ҡанаты менән генә талпынып, бер ҡыр ҡаҙы осорға аҙаплана.* М. Ғафури. *Күк ыласын ҡоштоң балаһы талпына-талпына бауҙа үлә* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ҡапыл ҡуҙғалырға йәки торорға ынтылыу. *Ғәйникамал инәй урынынан ҡалҡа биреп, талпынып ҡуйҙы.* Я. Вәлиев. *Толпар бер талпын-*

*ған икән, сынйыр өҙөлөп киткән* (Әкиәттән). / *күсм.* Хис-теләк менән ашҡыныу. *Минең егет саҡ, көстө ҡайҙа ҡуйырға белмәй, талпынып йөрөгән ваҡыт.* Д. Бураҡаев. *Осоп барып күрер өсөн талпына минең күңел* (Халыҡ йырынан).

**ТАЛПЫНЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **талпыныу.** *Талпынышып осоу.*

**ТАЛСАЙТЫУ** *ҡ.* Кирә ҡуйыу (аяҡты). *Аяҡты талсайтып баҫыу.*

**ТАЛСАЙЫУ** *ҡ.* Аяҡты кирә ҡуйыу. *Талсайып баҫыу.*

**ТАЛСЫБЫҠ** *и.* Нәҙек оҙон һыйығыр сыбыҡ. *Ҡолас етмәҫ ағастар талсыбыҡтай сайҡала.* Я. Вәлиев. *Талсыбыҡҡа теҙгән алабуғаларын күтәреп, Бәҙри ҡайтып инде.* У. Кинйәбулатов. / Сағыштырыу формаһында: нығынып етмәгән йәш үсмер балаларға ҡарата әйтелә. *Талсыбыҡтай зифа. Талсыбыҡ кейек.*

**ТАЛСЫҒЫУ** [талсыҡ*ғ*] *ҡ.* **1.** Арып, бөтә тән талып, ауырайыу. *Талсыҡҡан ат. Талсыҡҡан юлсы.* ■ *Саҡабай өҫтөнә күтәрелеүгә Ҡола ҡашҡа ла талсыҡты.* С. Кулибай.

**2.** *күсм.* Рухи йәһәттән йонсоу. *Көтөп талсығыу.* ■ *Мәктәп артындағы .. тәлгәш ҡайын яңғыҙлыҡтан талсыҡҡан төҫлө моңайып ҡына ҡояшты оҙата.* Х. Ғиләжев. *[Марат] уйлана ла уйлана. Талсығып серемгә китһә, һаташырға тотона.* Ә. Хәкимов.

**ТАЛСЫҠЛАУ** *ҡ. диал.* Талсығыу.

**ТАЛСЫҠТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Арытыу, хәлһеҙләндереү. *Оҙон юл талсыҡтырҙы.*

**2.** *әйһ. ф. ҡар.* **талсығыу** 1. *Көнө буйы бил яҙмай эшләп талсыҡтырҙы.*

**ТАЛТА** *и. диал.* Көс, ҡеүәт.

**ТАЛТАЙЫУ** *ҡ. диал.* Талсайыу. *Талтая баҫыу.*

**ТАЛТАЛЫ** *с. диал.* Көслө, ҡеүәтле. *Йүгеректең йөк тартҡаны талталы була.* С. Кулибай.

**ТАЛТАНЛАУ** *ҡ. диал.* Тайпаилау. *Талтанлап атлау.*

**ТАЛ-ТИРӘК** *и. йыйн.* Тал һәм тирәк ағастары. *Һандуғаскай һайрай тал-тирәктә, бер йырламай нисек түҙергә* (Халыҡ йырынан).

**ТАЛТЫМ** *с. диал.* Булдыҡлы. *Ҡалған улдарын бабай, былары талтымыраҡ, уңғаныраҡ, әйҙә, иген үҫтерһендәр, тип, Ашҡаҙар менән Иҙел араһындағы яланға урынлаштырған* (Легенданан).

**ТАЛЫҒЫУ** [1] [талыҡ*ғ*] *ҡ.* **1.** Берәй дауамлы эш-хәрәкәттән арыу, йонсоу. *Ауыр эштән талығыу. Көтә-көтә талығыу.* ■ *Дәүләтбай ағай .. күп ер үтеп арыған, аты ла талыҡҡан.* Ә. Вахитов. *[Заятүләк:] Шоңҡар ҡошом талыҡҡан, оса алмайса яланға.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». / Арыу, талыу (берәй ағзаға ҡарата). *Оҙаҡ баҫып тороп аяҡтар талыҡты.* ■ *Талыҡҡансы күҙҙәрем, шыршы урман гүзәллеген, ауылдарҙы күҙләнем.* Х. Кәрим.

**2.** *күсм.* Рухи ғазап кисереү, ғазапланыу. *[Егет] юҡһына, күңеле яңғыҙлыҡтан талыға.* Н. Мусин. *[Тауыҡ:] Ни ерем кәм ыласындан? Шуны уйлап талыҡтым.* Ҡ. Даян. *Һүнгән өмөт.., [кеше] төн үткәрә талығып, интегеп.* М. Сөндөклө.

**ТАЛЫҒЫУ** [2] [талыҡ*ғ*] *ҡ.* **1.** Рәхәтлеккә та иҙерәү. *Талығып ултырыу.* ■ *Ил-йорт һабан ҙан арынып, тәрән йоҡлай ине талығып.* С. либай.

**2.** Нәмә менәндер нығ әҫәрләнеп, онотo *Көйгә талығып бейеү.* ■ *Бабайҙың баҡсаһ көн дә иртән бер алтын ҡош килеп, талығ -талығып һайрай .. торған булған* (Әкиәтт

**ТАЛЫҠ** *и.* **1.** Таҡта йәки бүрәнәне ял өсөн ҡаҡҡан ағас; шына. *Талыҡ ҡағыу.*

**2.** Һынған аяҡ-ҡулды ҡоршап бәйләгән нә *Талыҡ һалыу.*

**ТАЛЫҠЛАУ** *ҡ.* **1.** Таҡта, бүрәнәне ял ағас ҡағыу. *Бүрәнәне талыҡлау.*

**2.** Һынған аяҡ-ҡулды ҡоршап, ҡабыҡ бәйл өйсөкләү. *Аяҡты талыҡлау.*

**ТАЛЫҠТЫРЫУ** [1] *ҡ. ҡар.* **талсыҡтырыу** *Талыҡтырып атын, Аҫылбай ҡайтып төшә көн тигәндә.* М. Тажи.

**ТАЛЫҠТЫРЫУ** [2] *ҡ. һөйл.* **1.** *ҡар.* **талдырыу** *Уйға талыҡтырыу.*

**2.** *диал. ҡар.* **быҡтырыу** 1. *Ит талыҡтыры*

**ТАЛЫҠҺЫРАУ** *ҡ. һөйл.* Иҙрәп, онотолғ һымаҡ булыу; талығыу. *Талыҡһырап ултыры*

**ТАЛЫМ** *и.* Айырым бер ашҡа булған телә *Талым килеү.* ■ *Тос иттең еҫе моронон һуғылыу менән уның [Гәрәйҙең] талымы ҡайтт* Б. Бикбай.

**ТАЛЫМЛАНЫУ** *ҡ. ҡайт. ҡар.* **талымла** *Талымланып, ашамай ултырыу.* ■ *Уҡытыусы етешмәй ине. Беҙгә үтә талымланып торорғ тура килмәне... Әҙме-күпме белеме булға бөтә кешене файҙаландыҡ.* Ғ. Әмири.

**ТАЛЫМЛАУ** *ҡ.* **1.** Аш яратмай һайланыу *Аш талымлау.* ■ *[Баҫҡан өйрәк] тиҙерәк ояһына ҡайтыр өсөн, ни тура килһә шуны ашай .. талымлап тормай.* Ғ. Боғданов.

**2.** *күсм.* Уны-быны яратмай һайланыу. *Кейем талымлау. Талымлап тормай барыһын да эшләү.*

**ТАЛЫМЛЫ** *с.* **1.** Аш яратмай, һайланыусан. *[Гөлбикә:] Ул һөрһөгән итте мин бешерә буламмы? Кире биреп ебәрҙем. Нефтселәр улар бик талымлылар бит.* Н. Асанбаев.

**2.** *күсм.* Уны-быны яратмай һайланыусан. *[Зөләйхә:] Заманында мин дә бик наҙлы, дуҫтарға хараn талымлы инем.* Б. Рафиҡов.

● *Талымлыға аш килешмәҫ.* Мәҡәл.

**ТАЛЫМЛЫЛЫҠ** *и.* Талымлы булыу сифаты, талымлы кешегә хас сифат. *Талымлылыҡ күрһәтеү.*

**ТАЛЫМҺАҠ** *с. диал. ҡар.* **талымлы** 1.

● *Ауырлы ҡатын талымһаҡ.* Мәҡәл.

**ТАЛЫМҺЫҘ** *с.* **1.** Аш һайламаған, булғанын ашаусан. *Ашауға талымһыҙ кеше. Талымһыҙ булыу. // Талымһыҙ ашау.*

**2.** *күсм.* Уны-быны һайламай, булғанына күнеүсән. *Эшкә талымһыҙ кеше. // Талымһыҙ эшләү.* ■ *Эшкә гәжәп талымһыҙ шул Баймораt, йыбанмай эшләй.* Н. Мусин. / *һөйл.* Төрлө шарттарға ла түҙемле, әрһеҙ (үҫемлектәргә ҡарата). *Талымһыҙ гөл. Талымһыҙ ағас.*

**ТАЛЫМҺЫҘЛЫҠ** *и.* Талымһыҙ булыу, талымһыҙ кешегә хас сифат. *Эштәге талымһыҙлыҡ. Тормоштағы талымһыҙлыҡ.*

**ТАЛЫМҺЫРАУ** *ҡ. һөйл. ҡар.* **талымлау.**

**ТАЛЫУ** [1] *к.* Дауамлы эш-хәрәкәттән хәлһеҙләнеү (айырым ағзаға карата); арыу. *Беләк тала. Бил тала. Быуын тала. Күҙ тала. Ҡул тала. Ҡанаты талған ҡош.* ■ *Йомшаҡ, йылы, иркә май һауаһы — талған йөрәктәрҙең дауаһы.* Ғ. Амантай. *Илкәйемә лә шул ҡайтыр инем аяктарым талһа, имгәкләп* (Халыҡ йырынан). / Хәл бөтөү, арыу (бөтә тәнгә карата). *Талыуҙы белмәй эшләү.* ■ *Көнө буйы эшләп талғандар ҙа өңдәрендә йоклай ҡондоҙҙар.* М. Уразаев.

**ТАЛЫУ** [2] *к.* Нимәнеңдер тәьҫирендә булып үҙ-үҙеңде онотоу, ниндәйҙер хәлгә бирелеү; сумыу. *Йокоға талыу. Моңға талыу. Серемгә талыу.* ■ *Тып-тын, моңһоу йәйге таңда хиссиәттән уйға талдым мин.* Ғ. Амантай. *Өс көн буйына керпек тә ҡаҡмай .. йонсоған һалдаттар төнгө ялға талғандар.* Ф. Рәхимғолова.

**ТАЛЬК** [*рус.* ⟨ *гәр.*] *и.* Ҡатлауланып торған аҡ йәки йәшкелт төҫтәге йомшаҡ минерал (онтаҡ хәлендә медицина һәм техникала ҡулланыла). *Тальк яткылығы. Сейләнгән урынға тальк һибәләр.*

**ТАЛЬЯН** [*рус.* тальянка] *и.* Бер рәтле гармун. *Тальян гармуны. Тальянда уйнау.* ■ *Күмәк йыр башланды, кемдер баҫты тальян телдәрен.* Ғ. Сәләм.

**ТАЛӘБӘ** [*гәр.*] *и. иҫк. йыйн.* Мәҙрәсә шәкәрттәре, уҡыусылар. *Яҙ булһа, кәсбе һауа кылып ята Мәскәү, Ҡаҙан талəбәһе кымыҙ эсеп.* М. Ғафури.

**ТАМ** [1] *и. иҫк.* **1.** Ҡойма. *Өйөнән алтын-көмөш кулына алып, ярына там торғоҙоу уйын алды.* «Буҙйегет».

**2.** Өй түбәһе, өй башы. *Төндә бераү тамда йөрөй. Батша уны күреп: «Һин, нишләп йөрөйһөң өй башында?» — ти* (Әкиәттән).

**3.** Ил сиген ҡарауылларға һаҡсы ҡуйыу өсөн эшләнгән бейек ҡоролма. *Улар .. хәүеф-хәтәр хаҡында хәбәр биреп торорға тау баштарына тамдар ҡуйып йәшәгән.* Ғ. Ибраһимов.

**ТАМ** [2] [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Тулы, теүәл. *Там азатлыҡ.* ■ *Һин үҫерһең иркәлектә, там һигеҙгә йәш тулыр.* Ш. Тульвинский.

**ТАМ** [3] [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Ау, тоҙаҡ. *Хөкүмәттең истибдады арҡаһында истибдад беҙҙәргә лә булды бер там.* М. Ғафури.

**ТАМ** [4] [*гәр.*]: **там итеү** *һөйл.* ниҙер теләп, өмөт итеү; ымһыныу. *Берәүгә берәү астан бармай, бер нәмә лә там итеп йөрөмәй.* Т. Хәйбуллин.

**ТАМАДА́** [*рус.* ⟨ *груз.*] *и.* Аяҡсы, көрәгәсе.

**ТАМАҠ** *и.* **1.** Ауыҙ ҡыуышлығын тын юлы һәм ҡыҙыл үңәс менән тоташтырған урын. *Тамаҡ төбө. Тамаҡ сайкау.* ■ *Тоҙло эҫе пар һауаға күтәрелеп, тамаҡҡа һыҡый.* З. Биишева. *Тамаҡ кипте, бик эске килде.* Д. Юлтый. / (*йәки* **тамаҡ аҫты**) Ҡош, йәнлек муйынының алғы өлөшө. *Тамаҡ аҫты кара ҡош. Тамаҡ аҫты аҡ быҙау.* ■ *[Тоҙаҡка] ап-аҡ тамаҡлы .. төлкө эләккән, ти* (Әкиәттән).

**2.** Туҡланыу ағзаһы; ҡарын, ҡорһаҡ. *Ас тамаҡ. Туймаҫ тамаҡ. Тамаҡҡа ашау.* ■ *[Шатморат] иң тәүҙә тамағын туйҙырҙы, унан һуң йоклап алды.* Д. Исламов. **Тамаҡҡа алыу** ашау. **Тамаҡҡа аш бармау** берәй кисереш тәьҫирендә ашай алмау. **Тамаҡ(ҡа) эсеү** *һөйл.* ашау (ғәҙәттә йылы, шыйыҡ аҙыҡҡа ҡарата әйтелә).

**3.** Ашау-эсеү, туҡланыу мөмкинлеге. *Тамаҡ артынан йөрөү. Тамаҡ өсөн килеү. Тамаҡтан яҙыу. Тамаҡты ҡайғыртыу.* ■ *[Мәфтуха карсыҡ Зинуңәгә:] Тамағыңдың да бер ҙә рәте ҡалманы, ҡыҙым. Бик йонсойһоң ахыры.* Ә. Вәли. **Тамаҡ хаҡы** (*йәки* **ялы**) ашау-эсеү иҫәбе. *Тамаҡ ялына эшләү.* / Көндәлек ашау-эсеү кәрәге, аҙыҡ. *Иртәнге тамаҡ. Киске тамаҡҡа әҙерләү. Тамаҡ йүнләү.* ■ *Егеттең януарҙарына тамаҡ биреп.., үҙен өйгә индереп ҡунаҡ итәләр* (Әкиәттән).

**4.** *күсм.* Ашарҙай кеше, йән эйәһе. *Артыҡ тамаҡ. Тамаҡ һанынан иҫәпләү.* ■ *Беҙ һигеҙ бала инек, шуға атай менән әсәйҙе лә өҫтәһәң — ун йән — ун тамаҡ тигән һүҙ.* М. Тажи.

**5.** Йылғаның бөткән, ҡойған урыны. *Агиҙел тамағы. Дим тамағы. Ике йылға тамағына ултырған ауыл.* / Йырын, ҡул кеүек иңкеү урындарҙың түбәнге, бөткән урыны. *Ҡул тамағы.* ■ *Уй тамағына еткәс, ул [егет] һулаҡайға ҡайырылды.* Ж. Кейекбаев.

**6.** *күсм. һөйл.* Алҡым. *Тамағы тар итек.*

□ **Тамаҡ итеү** ашау.

♦ **Ҡыл тамаҡ** ҡыҙыл үңәс кибеү йәки шешеүҙән килгән аш үтмәҫ ауырыу. **Тамаҡ айырыу** һәйбәт ашты өйҙәге башҡа кешенән айырып ашау. *Беҙҙең өйҙә тамаҡ айырыу булмай торғайны.* Б. Бикбай. **Тамаҡ аҫрау** ашарға табыу, туҡланыу. *Йылкынан да мәшәкәтһеҙ мал юк. Йәйен һимереп ныгынһа, кышын тибендә йөрөп булһа ла тамаҡ аҫрай.* Д. Исламов. **Тамаҡҡа [арҡыры] тороу** берәү бер нәмә өмөт иткәндә мыҫҡыллап, көләп әйтелә. *[Кыҙҙар — еңгәләренә:] Ашарһығыҙ туйҙы. Тамағығыҙға арҡыры тормаһын.* Һ. Дәүләтшина. **Тамағына арҡыры торғор** (*йәки* **торһон**) ҡарғағанда, әрләгәндә әйтелә. *[Иргәле:] Беҙгә тейеш арыштың икешәр ботон бирмәй алып калды, тамағына торғоро!* Ғ. Дәүләтшин. **Тамаҡ ебетеү** ниҙер эсеү.— *Ҡана, һыуһын алып кил әле. Бынау ил батырҙарының тамағын ебетеп ебәрәйек.* Б. Вәлит. **Тамаҡ киреү** ауыҙҙы ҙур асыу (йырлағанда, ҡысҡырғанда). *Тамаҡ киреп йырлау. Тамаҡ киреп ҡысҡырыу.* **Тамаҡҡа тығылыу** кешене рәнйетеп, ирекһеҙләп алған нәмә зыян килтерә, файҙаһыҙ була тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Гәрәй:] Хоҙаның ҡаты кәһәре төшөр әле бер, кеше малы тамағығыҙға тығылыр.* Б. Бикбай. **Тамаҡ ҡылҡылдау** ниҙер ашарға, эсергә ымһынып, йотоноу. *[Ҡуҙыйкүрпәс] бер уйға барып етһә, тамаҡтары ҡылҡылдап, бурелəр .. ултыра, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». **Тамаҡ ҡырыу** еңелсә йүткергән һымаҡ итеп тамаҡ төбөн таҙартыу. *Зариф халыҡҡа күҙ йөрөтөп сыкты, тамаҡ ҡырып алды, шунан ғына һөйләй башланы.* Н. Мусин. **Тамаҡ сакырыу** ирекһеҙҙән тамаҡ төбөнән сиҡ-сиҡ иткән тауыш сығарыу; сиҡылдау. **Тамаҡ ялғау** әҙ-мәҙ ҡапҡылап, асыҡҡанды баҫыу. *[Алтынбикә:] Кил, улым, һин дә тамаҡ ялғап ал, асыҡҡанһыңдыр.* М. Тажи. **Тамаҡ ярыу** ныҡ ҡысҡырыу. *[Карауыҙ] юҡка-барға һауылдап тауыш ҡуптарырға, тамаҡ ярырға яратмай торғайны.* С. Кулибай. **Тамаҡ яуы** эшләмәй, буш ашаған кешегә әйтелә. **Татлы**

(*йәки* **тәмле) тамаҡ** тәмле-татлыны ғына ашарға яраткан кешегә әйтелә. **Әрәм тамаҡ** *кар.* **әрәм** [2].

**ТАМАҠБАУ** *и.* Атты еккәс, ҡамыт ағасының башын тартып бәйләй торған бау. *Мәрхәбә ирҙәр һымаҡ тубығын терәп, ҡамыттың тамаҡбауын .. тартып бәйләне, арҡалыкты күтәрҙе.* Ш. Янбаев.

**ТАМАҠЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Ашатыу, туйындырыу. *[Әхтәмов:] Завод-фабрикалағы эшселәрҙе тамаҡландырыу өсөн икмәк кәрәк.* А. Таһиров.

**ТАМАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Ашау, тамаҡ туйҙырыу, туйыныу. *Балыҡ менән тамаҡланыу.* ■ *Беҙ сәй эсеп, тамаҡланып бөткәндә, ҡараңғы төшкәйне.* Д. Юлтый.

**ТАМАҠЛАУ** *ҡ.* Боғаздан тешләп йәрәхәтләү йәки үлтереү, боғазлау (йырткыстарға ҡарата). *Әүжән урыҫының ҡолонон бүре тамаҡлап киткән.* Ж. Кейекбаев.

**ТАМАҠЛЫҠ** *и.* Ашау-эсеүгә кәрәк булған сығым, ашау өлөшө. *Тамаҡлыҡ өсөн ҡалдырыу.* // *Тамаҡлыҡ аҡса.* ■ *[Үмәр Гөлйөҙөмгә:] Шунда сәсеп ал. Балаларҙың бәхетенә үҫеп китһә, аҙ булһа ла, тамаҡлыҡ булыр.* Һ. Дәүләтшина.

**ТАМАҠҺА** *и. диал.* Тамаҡбау.

**ТАМАҠҺАУ** *с. диал.* Ашамһаҡ.

**ТАМАҠҺЫУ** *ҡ. диал.* Асығыу.

**ТАМАМ** [*ғәр.*] *р.* **1.** Бөтөнләй, тулыһынса, шыпа. *Тамам аптырау. Тамам арыу. Тамам өмөттө өҙөү. Тамам тынысланыу. Тамам ышаныу.* ■ *Арыҡтарҙа тамам һыу кипте, эсә күкрәгенән һөт китте.* М. Кәрим.

**2.** *с. хәб. функцияһында* Эш-хәлдең һуңы еткәнен, бөткәнен белдерә; бөттө. *Хат тамам. Әңгәмә тамам.* ■ *[Батша:] Ҡыҙымды һиңә бирәм. Шуның менән туй тамам* (Әкиәттән).

□ **Тамам булыу** тамамланыу, бөтөү. *Был хикәйәт тамам булды ошо урында.* «Бабсаҡ менән Күсәк». **Тамам итеү** тамамлау, бөтөрөү. *Шуның менән тамам итәм инде бөтә һүҙемде* (Бәйеттән).

**ТАМАМИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Тамам булған; бөткән. *Тамами эш.*

**ТАМАМЛАНЫУ** *ҡ.* Берәй эш-хәлдең һуңы етеү; бөтөү. *Лекция тамамланды. Яҙғы эштәр тамамланды.*

**ТАМАМЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. кар.* **тамамлау.** *Эште тамамлатыу.*

**ТАМАМЛАУ** *ҡ.* Эш-хәлде аҙағына еткереү; бөтөрөү. *Докладты тамамлау. Уҡыуҙы тамамлау.* ■ *Бер башлағас, бөтмәй ҡалмаһын, тамамлайыҡ йырҙың аҙағын.* Ғ. Сәләм.

**ТАМАН** *с.* **1.** Күләме, дәүмәле, үлсәме менән тура килгән. *Таман аяҡ кейеме. Кәүҙәһенә таман күлдәк. Таман булыу. Таман итеп тегеү.* // *Таман яһау.* ■ *[Маруся] сүйын сүлмәктәрҙе, кәстрүлдәрҙе һәр берәһенә таман ухыуат, таба тоҡостар менән оло мейескә .. күсер[ә].* Һ. Дәүләтшина. *Һөйәбикә .. матур кейемдәрҙе кейеп алды, ти. Үҙенә үлсәп теккән кеүек таман ғына булып тора, ти* (Әкиәттән).

**2.** Тейешле дәрәжәләге, кәрәгенсә булған. *Йылылығы таман һыу. Кешеһенә таман эш. Эҫелеге таман мунса.* // *Мейесте таман ғына яғыу.* ■ *Гәрәй ике күнәк һөт һыйышлы сипарат алды. Ишле мал өсөн бик таман.* Б. Бикбай.

**3.** *күсм.* Кешегә үсәп әйтелә. *[Ғариф:] Таман булды һиңә, Камила килен, телеңә күрә бик таман.* Д. Исламов.

**ТАМАНЛАУ** *ҡ.* **1.** Тейешле бер самаға, күләм-дәүмәлгә килтереү; таман итеү. *Аштың тоҙон таманлау.* ■ *Таңһылыуға ла ғүмерендә беренсе тапкыр уҙ кәүҙәһенә таманлап уҡалы еләндәр, еҙ ҡаҙаулы башҡорт итектәре тектеләр.* С. Агиш.

**2.** *һөйл.* Таман булғанлығын самалап үлсәү. *Итекте таманлап ҡарау.*

**ТАМАНСА** *с. һөйл.* Тейешле йылылыҡта, кәрәгенсә булған. *Таманса һыу. Таманса булыу.* // *Һыуҙы таманса ғына йылытыу.*

**ТАМАНСАЛАУ** *ҡ. һөйл.* Таманса итеү. *Һыуҙы тамансалап ҡуйыу.*

**ТАМАША** [*фарс.*] *и.* **1.** Иғтибарҙы йәлеп итерлек күренеш. *Ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро, бала-саға фронт һыҙығынан тылға оҙатыла. Был тамаша күңелгә ауыр йөк булып ятты.* Т. Кусимов. *Кешеләр майҙандағы тамашаларҙы ҡарап йөрөй. Тамашаларҙың да тамашаһы — һарай уртаһындағы бейек ёлка ине.* М. Кәрим.

**2.** Халыҡ алдында башҡарылған ҡыҙыҡлы уйын йәки сәхнә әҫәре. *Тамаша күрһәтеү. Тамаша ҡарау.* ■ *Хәҙер бөтә өйҙәрҙә лә тип әйтерлек телевизор бар, шуға клубка әҙ йөрөйҙәр, өйҙә генә тамаша күреп кис уҙғаралар.* М. Кәримов.

□ **Тамаша итеү** (*йәки* **ҡылыу)** ҡарау, күҙәтеү. *Тауҙың башына менеп еткәс, аттарҙы туҡтатып, хәл йыйырға, тирә-яҡты тамаша ҡылырға булдыҡ.* М. Ғафури.

**ТАМАШАСЫ** *и.* Тамаша (2 мәғ.) ҡараусы. *Тамашасылар спектаклде яратып ҡараны. Тамашасылар алдында сығыш яһау.* **Тамашасылар залы** тамашасылар ултыра торған зал.

**ТА́МБУР** [1] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Тимер юл вагонының баш баштарындағы, ике ишек араһындағы ҙур булмаған майҙансыҡ. *Тамбур ишеге.* ■ *Мин тамбурҙа баҫып ҡарап барҙым Туймазыны үтеп киткәндә.* М. Тажи.

**ТА́МБУР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Элмәкләп сәнсеп сигеү төрө. **Тамбур ебе** сиратылған ҡалын сигеү ебе. **Тамбур энәһе** башы ырғаҡлы сигеү энәһе.

**ТАМҒА** [1] *и.* **1.** Берәй ырыу йәки араның танытмаһы булған шартлы билдә. *Сүмес тамға. Тараҡ тамға. Ара тамғаһы. Ырыу тамғаһы.* ■ *Бабай үҙҙәренең ағасы имән, ҡошо торна, тамғаһы ян .. булғанын әйтте.* К. Мәргән. / Мал-мөлкәткә һалына торған шул уҡ билдә. *Атҡа тамға баҫыу.* ■ *Әхмәҙиҙең тирәк олонона балта менән ҙур итеп соҡоп һалған һәнәк тамғаға күҙе төштө.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Кешенең үҙ шәхесен дөрөҫләү өсөн исем, фамилия урынына ҡуйылған билдә. *Тамға ҡуйыу. Тамға һалыу.* ■ *Олатайымдың тамғаһы .. бармаҡ битенә ҡором яғып, шуны .. баҫыу булған.* Б. Бикбай. *Бабайҙар урмандарҙы һатыу тураһындағы ҡағыҙға тамға һалалар.* Д. Исламов.

**3.** Бер нәмәне башҡаһынан айырыу өсөн ҡуйылған билге. *Тамға һалдым бөҙрә ҡуш ҡайынға дуҫлыҡ билдәһе итеп ғүмергә.* Н. Иҙелбай. / *күсм.* Ниндәйҙер сифатты, хәлде белдер-

гән билге. *Хурлык тамғаһы.* ■ *Һөйгән эшенән .. мәхрүм булып йәшәү кайғыһы уның бөтә йөрөш-торошона үҙ тамғаһын һалған.* З. Биишева.

4. Нимәнеңдер шартлы билдәһе. *Топографик тамға. Элементтың химик тамғаһы.*

♦ **Кул тамғаһы** кешенең үҙ шәхесен дөрөҫләп яҙған фамилияһы. *Кул тамғаһы куйыу. Кул тамғаһын алыу.*

**ТАМҒА** [2] *и.* Билдә, тамға һала торған корал.

**ТАМҒАЛАНЫУ** *к. кайт. кар.* **тамғалау.** *Тамғаланған мал.*

**ТАМҒАЛАТЫУ** *к.* Тамға һуктырыу.

**ТАМҒАЛАУ** *к.* Тамға менән билдәләү; тамғалы итеү, тамға һуғыу. *Тамғалап куйған ағас. Атты тамғалау.*

**ТАМҒАЛЫ** *с.* Тамға [1] (1 мәғ.) һалынған. *Тамғалы солок.*

♦ **Тамғалы карағай** башкаларҙан айырылып торған күренекле кешегә карата әйтелә.

● *Тамғалы мал юғалмаҫ.* Мәкәл.

**ТАМҒЫ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ниҙер алыуға бағлаған өмөт; нәпселе өмөт. *Тамғыны һуҙыу.* ■ *Таһирйән хәлфәнең эштәре алға киткән һайын тамғыһы арта барҙы.* З. Һаҙый.

□ **Тамғы итеү** кешенән ниҙер көтөү; өмөт итеү.

**ТАМҒЫЛАНЫУ** *к. иҫк.* Нәпсегә бирелеү. *Тамғыланған байбисәң куңалтак кейеп итеген, тернәкселектә көн итер* (Кобайырҙан).

**ТАМҒЫЛАУ** *к.* Һирәк-һаяк тамыу. *Тамсы тамғылай.*

**ТАМҒЫЛЫ** *с. иҫк.* Тамғыһы, нәпсеһе булған.

**ТАМҒЫҺЫҘ** *с.* Эшләгән эше өсөн әжер көтмәгән, эскерһеҙ үтәгән, там итмәй эшләгән. *Эшкә тамғыһыҙ кеше.*

**ТАМДЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **тамыу** 1. *Күҙгә дарыу тамдырыу.*

**ТАМО́ЖЕННИК** [*рус.*] *и.* Таможняла хеҙмәт итеүсе.

**ТАМО́ЖНЯ** [*рус.*] *и.* Сик аша үткән тауарҙы тикшереүсе, улар өсөн хак алыусы учреждение. *Ун биш минуттан поезд китә... Таможня аша үтәһе, документтарҙы тикшертәһе генә калды.* «Совет Башкортостаны», 1966, 23 апрель.

**ТАМПАК** [*рус.* томпак ⟨ *нем.*] *и.* Бакыр менән ырыкта иретмәһе. *Тампактан һуғылған балдак.* // *Тампак беләҙек. Тампак самауыр.* ■ *Кулдарына ап-ак тампак беҙрә тотоп, Ниса менән Йәнбикә өйҙән сыкты.* С. Кулибай.

**ТАМПО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Зарарһыҙлап, тәңкләп һалынған марля киҫәге (йәрәхәтте таҙалау өсөн кулланыла).

**ТАМПОНА́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. тау* Скважина йәки шахтаға һыу һаркмаһын өсөн ерҙәге төрлө юлак, бушлыктарҙы цемент менән тултырып, һыу юлын ябыу эше. *Тампонаж үткәреү.* ■ *Бураулау коллективы тампонаж цементы урынына нык гипс файҙалана.* «Совет Башкортостаны», 1966, 18 ғинуар.

**ТАМСЫ** *и.* **1.** Шыйыклыктан бүленеп төшкән бәләкәй генә өлөш. *Кан тамсыһы. Ыҫык тамсыһы. Ямғыр тамсыһы.* // *Тамсы-тамсы тир.* ■ *Яҙҙар етә, ана тамсы тама, йылы сактар килә якынлап.* Ш. Бабич. *Башта һирәк-һаяк кына япрак кыштырлаткан тамсылар тиҙ арала койма ямғырға әйләнде.* Ә. Хәкимов. / *күсм.* Шул шыйыклык бөртөгөнә окшаш нәмә. *Алка тамсыһы.* // *Тамсы беҙәк.* ■ *Һин әйелеп өҙөп бирҙең миңә ике тамсы кайын еләге.* Р. Ғарипов.

**2.** (**йәки бер тамсы**) *күсм. һөйл.* Ниҙеңдер бик бәләкәй өлөшө, бөртөк. *Тамсыһын да калдырмай ашап бөтөү. Һүҙенең тамсыһын да аңламау.* ■ *Бер тамсы нур, бер тамсы моң кешеләргә көн һайын бирә алһам, йырланырға хаклымындыр, моғайын.* М. Кәрим.

**3.** (**йәки бер тамсы ла**) *р. мәғ.* Әҙ генә лә, сак кына ла. *Бер тамсы ла йәшермәй һөйләү.* ■ *Ете төн уртаһында ла тамсы керпек какмайым.* А. Игебаев.

♦ **[Бер] тамсы кан калғансы** *кар.* **кан** [1]. **Ике тамсы һыу кеүек** бер-береһенә бик нык окшаған кешегә йәки нәмәгә карата әйтелә. **Тамсылы дарыу** тамсылап тамыҙып эсә торған шыйык дарыу. **Тамсы гөлө** *кар.* **гөл.**

**ТАМСЫЛАУ** *к.* Тамсы-тамсы булып төшөү; тамыу. *Ямғыр тамсылай башланы.* ■ *Ирегән кар һыуҙары һарай түбәһенән .. тамсылап тора ине.* М. Тажи.

**ТАМТА́М** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Түңәрәк тирәскә йока тире кереп яһаған һуккылы музыка коралы; африкан дөңгөрө. *Тамтам һуғыу. Тамтам тауышы.*

**ТАМ-ТОМ** *с. һөйл.* Әҙ-мәҙ (һүҙ-хәбәргә карата). *Әле там-том булһа ла халык эсендә һүҙҙәр бар.* Т. Хәйбуллин.

**ТАМУК** *и.* **1.** Дини карашса, теге донъяла гөнаһлы кешеләрҙең йәнен язалай торған эҫе урын, йәһәннәм; *киреһе* ожмах. *Тамук уты. Тамукта яныу.* ■ *[Мулла:] Тамук шундай эҫе урын ул, уның эҫелегенең иге лә сиге лә юк.* Б. Ишемғол.

**2.** *күсм.* Ғазаплы ауыр шарттар, ғазаплы урын. *Рәсәйҙең бынамын тигән егеттәре бәхет эҙләгәнгә, хаклык эҙләгәнгә Себергә кыуыла. Себер, гүйә, был донъяның тамуғы.* Ә. Вахитов.

♦ **Тамук киҫәүе** *кар.* **киҫәү.**

**ТАМУКЛЫ: тамуклы булыу** *дини* гөнаһка батып тамукка инеү.

**ТАМШАНДЫРЫУ** *к.* Нимәгәләр теләк уятыу; ымһындырыу.

**ТАМШАНЫУ** *к.* **1.** Ашар нәмәгә ымһынып, яланыу, яҫканыу; кылкыныу. *Ғәфләт .. танауын тарткылай ҙа: — Какланған йылкы каҙыһы бешерәләр,— тип тамшана.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *күсм.* Нимәгәләр күҙ кыҙып ымһыныу. *Нигмәтулла .. өйөлөп яткан алтын бөртөктәрен күреп тамшанды.* Я. Хамматов.

**ТАМЪЯН** *и.* Бер башкорт ырыуының исеме.

● *Катайҙы дауға куй, тамъянды яуға куй.* Мәкәл.

**ТАМЫҘҒЫС** *и. һөйл.* Тамсылап дарыу тамыҙа торған нәмә. *Тамыҙғыс менән күҙгә дарыу һалыу.*

**ТАМЫҘҘЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **тамыҙыу** 1, 2. *Күҙгә дарыу тамыҙҙырыу.*

**ТАМЫҘЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **тамыҙыу** 1, 2.

**ТАМЫҘЫУ** *к.* **1.** Тамсы-тамсы итеп төшөрөү, тамсылап койоу. *Күҙгә дарыу тамыҙыу. Һыу тамыҙыу.* ■ *Хасбулат олатай һандыктың бик*

*күптән бикле тороп тутыҡҡан йоҙағын кәрәсин тамыҙа-тамыҙа көскә асты.* З. Биишева.

**2.** Абайһыҙҙан нимәгәлер бер нәмәнең тамсыһын төшөрөү. *Күлдәккә май тамыҙыу.*

**3.** Тамсы-тамсы итеп сығарыу, тамсылап түгеү. *Күҙ йәшен тамыҙыу.* ■ *Иллеләге инәңде хур итмәһендәр тиһәң, ынйылай йәшен ағыҙып, сейәләй ҡаның тамыҙып .. көл итмәһендәр тиһәң, үлтер, үлым яуызды.* Р. Ниғмәти.

**4.** *күсм.* Үҙ яғына ыңғайлатыу өсөн кемгәлер йәшереп кенә бер нәмә биреү. *Бирәү ҡорал алырға килгән. Шул Камилға бер аҙ аҡса ла тамыҙған[ға] .. окшай.* А. Таһиров.

**5.** *күсм. һөйл.* Һуғыу, ҡундырыу. *Ҡараңғыла кемдер минең елкәгә бер-икене тамыҙып та алды.* Ғ. Ғүмәр.

**ТАМЫЛЙЫУ** *ҡ.* **1.** Тамсы һымаҡ тулышыу (емеш-еләк, сәскәгә ҡарата). *Бешкән сейәләр ҡып-ҡыҙыл булып тамылйып ултыра.*

**2.** *күсм.* Нурға тулышыу (күҙгә, йөҙгә ҡарата). *Күҙҙәре ҡап-ҡара, тамылйып тора.*

**ТАМЫР** *и.* **1.** Үсемлектең һыу, тупраҡтан аҙыҡ һура торған, көнгә күренмәгән өлөшө. *Үҙәк тамыр. Ян тамыр. Суҡ тамыр. Ағас тамыры. Үлән тамыры. Ваҡ тамыр. Тамыр төбө. Тамыр ебәреү.* ■ *Тамыры ташҡа ереккән ҡарағай, имән, ҡайыны — бары ла бар Уралтау* (Ҡобайырҙан). **Тамыр алыу** ултыртҡан урында тамырланыу, тамыр сығарыу. *Ҡарағай үсентеләре береһе лә ҡоромаған, барыһы ла тамыр алып үсеп киткән.* Ф. Әсәнов. **Тамыр ебәреү** тамыр сығарыу, тамырланыу. **Тамыр йәйеү** 1) ян-яҡҡа тамыр таратыу; ныҡлап тамырланыу; 2) *күсм.* ныҡлап урынлашыу. *Мөхәббәтең тамыр йәйҙе йөрәгем уртаһына* (Халыҡ йырынан). **Тамыр үреү** 1) тамыр ебәреү; 2) *күсм.* башланғыс алып үсеү. *Йәшәү дәрте тамыр урә күңел түрендә.* Ғ. Амантай.

**2.** Сәстең, тештең тәнгә инеп береккән өлөшө; төп. *Сәс тамыры.* ■ *Тештең тамыры яңаҡ һөйәгенең соҡорона ултырған.* А. Курамшина.

**3.** (*йәки* **ҡан тамыры**) Тән эсендәге ҡан йөрөй торған юл; ҡан юлы. *Йөрәк тамыры. Ҡул тамыры. Муйын тамыры. Сикә тамыры. Тамыр тибеше.* ■ *Ҡымыҙ аҡрынлап ҡына эсте йылытып, бөтә тамырҙарға йүгерә. Тәмле генә итеп талсыҡтыра.* Ғ. Дәүләтшин. *Нурислам .. күкһел тамырҙары бүртеп торған ҡулы менән битен һыйпап алды.* Ф. Исәнғолов. **Барлау** (*йәки* **йоҡо) тамыры** муйындың ике яғынан баш мейеһенә үткән йыуан ҡыҙыл ҡан тамыры. *Ҡурайсының барлау тамырҙары ҡабарып сыҡҡан.* Ғ. Дәүләтшин. **Тамыр ятыу** ҡан тамырының тибеше туҡтау.

**4.** *диал. ҡар.* **тарамыш** [1]. *Елкә тамыры.*

**5.** *күсм.* Бер ата-бабанан таралған кешеләр; нәҫел. *Моҡас тигән ҡарт һалған был ауылды.. Уның тамырҙары айырылып ауылдар төҙөгән* (Легенданан). / *диал.* Дуҫ, иптәш. *Икәүбеҙ тамыр булып уйнап-көлөп үҫкәйнек кесе йәштә.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**6.** *күсм.* Нимәнеңдер башланғысы, төбө; нигеҙ, сығанаҡ. *Тамырынан үҙгәртеү. Тамырынан ҡаҡшатыу.* ■ *Дауыт Юлтый өс йыл ҡан дарьяһы эсендә булғандан һуң ғына, империалистик һуғыштың социаль тамырын аңлауға килә.* Ғ. Хөсәйенов.

**7.** *грам.* Һүҙҙең төп мәғәнәне аңлатҡан башланғыс өлөшө. *Һүҙҙең тамыры.* // *Тамыр исем.*

**8.** *мат.* Күпмелер дәрәжәгә күтәргәндән һуң билдәле бер һанды бирә торған дәүмәл. *Квадрат тамыры. Куб тамыры.*

♦ **Ҡан тамыр** ныҡ бешеп етмәгән, йәшелерәк (игенгә ҡарата). *Арыш ҡан тамыр саҡта игеге булеп урыу бик яҡшы була.* Ә. Вәли. **Ҡыҙыл тамыр** ваҡ ҡына аҡ йәки һары сәскәле, быуынтыҡ һабаҡлы йомшаҡ үлән (буяу алалар). **Тамыр сереге** яңы шытып сыҡҡан сөгөлдөр үсентеһенең тамырын сереткән бәшмәк ауырыуы. **Тамырын ҡоротоу** юҡ итеү. **Татлы тамыр** ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған татырлыраҡ ерҙә үҫә торған оҙон йөнтәҫ һабаҡлы, тетмәкәй япраҡлы, күкһел аҡ төҫтәге суҡ сәскәле, ҡуҙаҡ орлоҡло үсемлек (промышленноста һәм медицинала ҡулланыла). **Тау тамыры** бер ҡарыш оҙонлоҡ быуынлы-быуынлы үлән (быуын һыҙлағанда ҡайнатып эсәләр).

● *Дегәнәк тамырынан гөл үҫмәй.* Мәҡәл. *Тамыр тамырға тарта.* Әйтем.

**ТАМЫРАҘЫҠ** *и. йыйн.* Төбө ашала торған йәшелсәләрҙең (кишер, сөгөлдөр, шалҡан һ. б.) дөйөм исеме.

**ТАМЫРҘАШ** *с.* **1.** Бер тамырҙан үҫеп сыҡҡан. *Тамырҙаш ағастар.* ■ *Беҙ һаман да икәү бергә булдыҡ, тамырҙаш шул ике тал төҫлө.* М. Кәрим.

**2.** *грам.* Бер үк тамырҙан яһалған. *Тамырҙаш һүҙәр.*

**3.** *мат.* Бер тигеҙ тамырға эйә булған. *Тамырҙаш тигеҙләмәләр.*

**ТАМЫРЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Ултыртҡан урында тамыр ебәреп ергә берегеү; тамыр алыу. *Тамырланған ағас. Тамырланған гөл.*

**2.** *күсм.* Барлыҡҡа килеү, башланыу. *Бая уҡ тамырлана башлаған болоттар .. тотош күкте ҡаплап алды.* Б. Бикбай.

**3.** Йәшәү өсөн ныҡлап урынлашыу; төпләнеү. *Ауылда тамырланып ҡалыу.* / Ныҡлы урын алыу.

**4.** Тамыр (3 мәғ.) кеүек бүртеп, тулышып ҡалҡыу. *Беләктәре тамырланып тора.*

**ТАМЫРЛЫ** *с.* **1.** Тамыры (1 мәғ.) булған. *Тамырлы ағас.*

**2.** *күсм.* Нигеҙе, төбө ныҡ; ныҡлы. *Байталдың юғалыуы .. тамырлы байҙар рәтенә инеп барған .. Әхмәҙигә ҙур зыян булды.* Ж. Кейекбаев.

**ТАМЫРЛЫҠ** *и.* Тамыр-томор күп урын. *Бейек тауға менер инем, менер юлдар тамырлыҡ* (Халыҡ йырынан).

**ТАМЫРСА** *и.* Төп тамырҙан (2, 3 мәғ.) айырылған ваҡ тамыр, тармаҡ. *Аорта тамырсаһы. Сәс тамырсаһы.*

**ТАМЫР-ТОМОР** *и. йыйн.* Төрлө үсемлектәр тамыры. *Тамыр-томор йыйып ягыу.*

**ТАМЫУ** *ҡ.* **1.** Тамсы-тамсы булып төшөү. *Йәш тама. Ҡан тама. Тамсы тама.* ■ *Түбәләрҙән һарҡып тамалар, яҙҙың һуңғы тамсы һыуҙары.* Ғ. Амантай. *Ҡарағаш ҡулындағы ҡурай осонан һөт тамды, ти* (Әкиәттән). / Абайһыҙҙан бер нә-

мәгә әҙ генә булып төшөү. *Кулдәккә май тамған.*

**2.** *кусм.* Тулышып бөркөлөү; балҡыу. *Йөҙөнән нур тама.* ■ *Керпегенән гөлдәр тама, күрһәм йөрәгем яна* (Халыҡ йырынан).

**3.** *кусм.* Төшөм төшөү, файҙа килеү. *[Хәбир:] Быныһынан да биш һум тамһа, эсте тишмәҫ ул.* Ғ. Байбурин.

♦ **Аҡмаһа ла тама** *кар.* **ағыу** [1].

**ТАНА** *и.* Бер йәштән ике йәшкә тиклемгә һыйыр малы. *Быуаҙ тана. Сәңгәсәр тана. // Тана һыйыр. Тана үгеҙ. Тана һөтө.*

♦ **Тар ергә тана башы** күмәк кеше янына тағы берәү килеп өҫтәлгәндә әйтелә.

**ТАНАҠАЙ** *и. кар.* **тана.**

**ТАНА-ТОРПО** *и. йыйн.* Йәш һыйыр малдары.

**ТАНА-ТЫУСА** *и. кар.* **тана-торпо.**

**ТАНАУ** *и.* Тын алыу һәм еҫ һиҙеү ағзаһы. *Бәләкәй танау. Йәмшек танау. Киң танау. Көмрө танау. Тыржыҡ танау. Тәлпәк танау. Бесәй танауы. Танау биле. Танау тишеге. Танау эсе. Танауҙы тартыу.* ■ *Баш әйләнә, танауға .. ауыр еҫ бәрелә.* С. Агиш. **Ҡылыс танау** оҙон ҡырлы танау. *Аҡ туфли кейгән ҡылыс танаулы кешенең фамилияһы Хәйруллин булып сыҡты.* С. Агиш. **Танау япрағы** танау осоноң ике яғындағы йомшаҡ кимерсәк.

♦ **Еүеш танау** ир ҡорона инмәгән йәштәргә түбәнһетеп әйтелә. *Юҡ инде. Киткән баш киткән, был еүеш танау алдында һыр биреп булмай.* Ф. Иҫәнғолов. **Йөн танау** эшлекһеҙ, йүнһеҙ кешегә ҡарата әйтелә. **Танау аҫты** (*йәки* **төбө**) бик яҡын ер; эргә. *Алыҫ булһа — бер хәл, ике аҙым, танау төбөндә бит кәнсәләр.* С. Кулибай. **Танау аҫты кипмәгән** *кар.* **еүеш танау. Танау буйына ҡарау** эрелек күрһәтеү; һаувланыу. **Танауға еҫ инеү** *йәки* **танауы еҫ белеү** донъяның ул-был нәмәһен һиҙә, аңлай башлау. *Танауҙарына еҫ инә башлағас, бергәләп аулаҡҡа йөрөнөләр.* Т. Килмөхәмәтов. **Танауға сиртеү** (*йәки* **һуғыу**) берәй эштә кемдәндер өҫтөн сығыу. **Танау күтәреү** (*йәки* **сөйөү**) эллә кем булып маһайыу; һауаланыу. *Йөрөйөм эле эллә кем булып, танауҙы сөйөп.* И. Ғиззәтуллин. **Танауҙы тартыу** өмөтләнеп тороп буш ҡалыу; һемәйеү. *Туйға бейә түгел, бәрәс тә һуймайбыҙ, танауҙарын тартһындар.* Һ. Дәүләтшина. **Танау төшөү** күңелһеҙләнеү. **Танау һуҙыу** нимәгәлер ымһынып, өмөтләнеп тороу.

● *Сакыралар тип, танауың һуҙма, бирәләр тип, ҡулың һуҙма.* Мәҡәл.

**ТАНГЕНС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. мат.* Мөйөштөң тригонометрик функцияларының береһе — тура мөйөшлө өсмөйөштә осло мөйөшкә ҡаршы ятҡан катеттың икенсе катетҡа нисбәтенән ғибәрәт.

**ТАНГО** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* Дүрт өлөшлө тактҡа ҡоролоп, ҡатмарлы хәрәкәттәрҙән торған парлы һалмаҡ бейеү һәм шуның көйө. *Булмәнең бер мөйөшөндә магнитофон .. әкрен генә итеп моңһоу танго уйнап ебәрҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 17 март.

**ТАНДЫР** [1] *с.* Һүрәнерәк, уртасараҡ ҡыҙыулыҡтағы. *Тандыр мунса. // Тандыр ғына ҡайнау. // Мунсаның тандырына барыу.* ■ *[Миңкамал:] Һөттө ныҡ ҡайнатма. Уттың тандырында ғына ҡайнатып ал.* Я. Хамматов.

**ТАНДЫР** [2] *и.* Яҡ-яғына, ҡырыйына тирәләп икмәк йәбештереп бешерә торған көршәк һымаҡ түңәрәк мейес (Урта Азияла, Кавказда таралған).

**ТАНИН** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ҡайһы бер үҫемлектәрҙә була торған ҡамаштырғыс матдә (техника һәм медицинала ҡулланыла). *Танин буяуы.* ■ *Сәй япрағын йыйғанда, кофеин һәм танинға бай .. йәш япраҡты йыялар.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 25 апрель.

**ТАНК** [1] [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Боролмалы башняһына туп һәм пулемёт ҡуйылған, броня менән көпләнгән, ҡарышлауыҡлы хәрби машина. *Ауыр танк. Еңел танк. Танк ғәскәрҙәре.* ■ *Башҡорт егеттәре атта ғына түгел, танкта ла үҙҙәрен һуғыш оҫтаһы итеп таныттылар.* Ә. Ихсан.

**ТАНК** [2] [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Шыйыҡлыҡ һалыу йәки уны йөрөтөү өсөн эшләнгән цистерна рәүешендәге ҙур һауыт.

**ТАНКЕР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Шыйыҡлыҡ ҡойоп ташый торған ҙур һауыттан ғибәрәт судно. *Нефть танкеры.*

**ТАНКЕТКА** [1] [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Пулемёт ҡуйылған бәләкәй генә тиҙ йөрөшлө танк (разведка яһау, бәйләнеш тотоу өсөн ҡулланылған).

**ТАНКЕТКА** [2] [*рус.*] *и.* **1.** Бейек үксәле тоташ табан. *Танкетка табанлы туфли.*

**2.** Ошондай табанлы ҡатын-ҡыҙҙың йәйге аяҡ кейеме.

**ТАНКИСТ** [*рус.*] *и.* Танк ғәскәрендә хеҙмәт иткән хәрби кеше.

**ТАНСА** [*рус.* танец ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Матур тән хәрәкәттәре ярҙамында художестволы образ тыуҙырыусы сәнғәт төрө. *Танса теорияһы.*

**2.** Көй ыңғайына ҡушарлап башҡарған төрлө нәфис тән хәрәкәттәре теҙмәһе һәм шундай бейеү өсөн яҙылған көй. *Танса көйө. Танса майҙаны. Тансаға өйрәнеү.* ■ *Тансаларға төштө Сәйҙел, Зәйнәп — икеһе.* Ғ. Сәләм.

**3.** Күңел асҡыс кисәнең ошо бейеүҙәрҙән торған өлөшө. *Концерттан һуң .. почта уйыны һәм танса башланды.* С. Ҡудаш.

□ **Танса итеү** көй ыңғайына ҡушарлап ритмик тән хәрәкәте башҡарыу; бейеү. *Ха-ха менән көлөп танса итәм, тып-тып баҫам.* Ш. Бабич.

**ТАНТАЛ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Химик элемент, ауыр иреүсән күкшел төҫтәге ҡаты металл.

**ТАНТАНА** [*ғәр.*] *и.* **1.** Мөһим, әһәмиәтле ваҡиғаға арналған күмәк байрам. *1-се Май тантанаһы. Тантана үткәреү.* ■ *Атайҙарҙың алған Октябре .. барыбыҙға ла бөйөк тантана.* С. Агиш. / Мөһим ваҡиғаға арналған йыйылыш йәки мәжлес. *Һәйкәл асыу тантанаһы. Юбилей тантанаһы.*

**2.** Ғорурлыҡ, шатлыҡ хисенән килгән рухи күтәренкелек. *Тантана менән һөйләү.* ■ *Зөлхизәнең йөҙөндә ... тантана, һөйөү-һөйөлөү шатлығы ине.* З. Биишева.

**3.** Өҫтөнлөк алыу, еңеү ҡыуанысы. *Ғәҙеллек тантанаһы.*

□ **Тантана итеү** 1) байрам итеү; 2) өҫтөн сығып шатланыу. *Ҡоҙалар йыйылып туй башлаған. Әхмәтгәле тантана иткән.* М. Сәғитов;

3) еңеп сығыу. *Якшылыктар гел тантана итһен.* Н. Нәжми.

**ТАНТАНАЛАУ** *к.* Тантана итеү, байрам итеү. *Ауыр көндәр үтер. Байрам булыр, Ватан тантаналар еңеүҙе.* Б. Бикбай.

**ТАНТАНАЛЫ** *с.* **1.** Ниндәйҙер бер тантанаға бәйле, мөнәсәбәтле булған. *Тантаналы көн.* / Мөһим ҙур ваҡиғаны йәки датаны билдәләүгә, байрам итеүгә арналған. *Тантаналы йыйылыш. Тантаналы кисә.*

**2.** Рухи күтәренкелек уятҡан; мөһабәт. *Тантаналы тынлыҡ.* / Юғары хис менән (әйтелгән, эшләнгән һ. б.), ғорурлыҡ белдергән. *Тантаналы тауыш. Тантаналы рәүештә ҡаршы алыу. Тантаналы рәүештә һүҙ башлау.* ■ *Ул [Хасбулат] миңә .. тантаналы ҡараш ташлап алды.* З. Биишева.

**3.** Әһәмиәте яғынан бик етди булған. *Тантаналы вәғәҙә.*

**ТАНТЫУ** *к.* *һөйл.* Аяҡтан йығыла яҙып арыу. *Ат тантыны, тарта алмай.*

**ТАНҺЫҠ** I *с.* Бер ҙә булмай йәки һирәк булып һағынғандан теләп алынған, ялҡытмаған. *Танһыҡ аш. Танһыҡ эш. // Танһыҡ күреү.* ■ *Йәш балаһы булмаған кешегә бала бик танһыҡ бит ул.* С. Агиш.

II *и.* Бер ҙә булмай йәки һирәк булып һағынғандан килгән теләк. *Танһыҡҡа ашау.* ■ *[Әхмәҙи:] Ҡаҡлаған ҡаҙ ботонан да ауыҙ иттек бына. Танһыҡҡа бик килеште.* Р. Низамов. *Таң һарғайыу түгел ҡояш ҡалҡһын, танһыҡтарым ҡанмай ҡайтмайым* (Халыҡ йырынан).

□ **Танһыҡ итеү** булмағандан йәки һирәк булғандан, һағынып теләү. *Танһыҡ итеп ашау.*

● *Ит күрмәгәнгә үпкә танһыҡ.* Мәҡәл. *Танһыҡҡа тары бутҡаһы.* Мәҡәл.

**ТАНҺЫҠЛАТЫУ** *к.* **1.** Һирәк булып һағындырыу, танһыҡ күрҙереү. *Танһыҡлатып кына килеү.* ■ *Танһыҡлатҡан ҡояш ҡапыл бер генә минутҡа көләсләнеп, балҡып ҡараны.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *әйһ. ф. ҡар.* **танһыҡлау.** *Ҡоймаҡты танһыҡлатҡан.*

**ТАНҺЫҠЛАУ** *к.* Булмағандан йәки һирәк булғандан һағынып теләү; танһыҡ итеү. *Һурпа танһыҡлау.* ■ *[Хәбибуллин:] Ҡайтыуыма картуф ярып бешер әле. Үҙебеҙҙең картуфты танһыҡлап киттем.* Х. Ғиләжев.

**ТАНЫҠЛАУ** *к.* Ни менәндер бер нәмәнең дөрөҫлөгөн белдереү, дөрөҫлөгөн күрһәтеү; дөрөҫләү. *Кешенең шәхесен таныҡлау. Күргән хәлде таныҡлау.*

**ТАНЫҠЛЫ** *с.* *һөйл.* Халыҡҡа киң билдәле. *Таныҡлы яҙыусы.*

**ТАНЫҠЛЫҠ** *и.* Кемде йәки ниҙелер күрһәткән һәм таныҡкан рәсми ҡағыҙ. *Командировка таныҡлығы. Тыуыу таныҡлығы. Үлеү таныҡлығы. Никах таныҡлығы. Таныҡлыҡ алыу.* ■ *[Хәмит:] Арыҫлан мулла ҡыҙына ярлы балаһы тип таныҡлыҡ яҙып биргән.* С. Агиш.

**ТАНЫҠСЫ** *и.* Ниҙелер күреп-белеп, дөрөҫләгән кеше; шаһит.

**ТАНЫЛҒАН** *с.* Халыҡҡа билгеле; данлыҡлы. *Танылған ғалим. Танылған уҡытыусы.*

**ТАНЫЛЫУ** *к.* **1.** Билдәлегә әйләнеү, билдәле булыу. *Донъяға танылыу. Халыҡҡа танылыу.*

**2.** Дан, исем алыу, данланыу. *Яманлыҡ менән танылыу. Батырлыҡ менән танылыу.*

● *Ир-егеттең аҫылы ил эшендә танылыр.* Мәҡәл.

**ТАНЫП** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**ТАНЫСҠАУ** *к.* *диал.* *ҡар.* **таҫҡау** 1. *Май таныҫҡау.*

**ТАНЫТМА** *и.* Ниҙелер дөрөҫләгән рәсми ҡағыҙ. *Авторлыҡ танытмаһы. Депутатлыҡ танытмаһы.* ■ *Ике малай мәктәпте тамамлап сыға.. Икеһенә лә танытма бирелә.* Б. Бикбай.

**ТАНЫТЫУ** *к.* **1.** Кем икәнде йәки таныш икәнде белдереү. *Әйтеп танытыу. Үҙеңде танытыу. Танытмаҫҡа тырышыу.* / Үҙ-ара таныштырыу. *Уйын башлангас та өй егете ҡыҙ ҡуҙләргә килгән егетте танытырға тейеш.* М. Буранғолов.

**2.** Ни менәндер үҙеңде билдәле итеү; күрһәтеү. *Эштә танытыу.* ■ *Бик аҙ ваҡыт эсендә лә нық танытты ул үҙен. Белделәр барса ғаләмдәр Туҡайҙың әйткән һүҙен* (Бәйеттән).

**3.** Ниҙеңдер дөрөҫлөгөн белдереү, дөрөҫлөгөн күрһәтеү. *[Батша:] Дейеүҙе үлтергәнеңде ни менән таныта алаһың?* (Әкиәттән).

◆ **Атаһын танытыу** *ҡар.* **ата.**

**ТАНЫУ** [1] (таны*) *к.* **1.** Кем йәки нәмә икәнен иҫләп алыу, белеү. *Атлауҙан таныу. Кейемдән таныу. Тауыштан таныу. Танымаҫлыҡ булып үҙгәреү.* ■ *Тарауыл ҡарт Һәүбән менән Аҡбуҙатты, алмас ҡылысты танып, бик ҡыуанған.* «Аҡбуҙат» / Күреп белеү. *[Юлия] Айбулатты ун беренсе йылдан алып яҡындан таный.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Айырым бер үҙенсәлеккә нигеҙләнеп кем йәки нимәнеңдер асылын, төп сифатын билдәләй алыу, белеү. *Дошманды таный белеү. Мал таныу.* ■ *[Зифа:] Кеше танырға өйрәндем. Кем бик түбән кеше, кем юғары — хәҙер инде мин айырам кеүек.* Ҡ. Даян.

**3.** Уҡый белеү. *Төрки таныу.* ■ *[Ҡолой Салауат тураһында:] Ул ҡыйыу, батыр нәмә. Көрьән таный, русса уҡый, яҙа.* Б. Бикбай. **Аҡ** (*йәки* **ижек, ҡара, хәреф, яҙыу**) **таныу** уҡый-яҙа белеү. *Аҡ танырға өйрәнеү. Яҙыу таныған кеше.* ■ *Бында наҙан, күҙе ҡара танымаған ярлылар, урта хәллеләрҙең күбеһе диңгә, өшкөрөү-төкөрөүгә ышана.* Ғ. Дәүләтшин.

**4.** Бар тип белеү, иҫәпкә алыу. *Алланы танымау.* / Килешеү, ҡабул итеү. *Йәшлек күрһә, сафлыҡ күрһә яна тиҙәр. Һис танмайым, таныйым мин, янамын шул.* Ғ. Рамазанов.

◆ **Танымаһаң, танытырмын** янап, ҡурҡытып әйтелә.— *Рәтләп һөйләш! Ағайыңды танымаһаң, танытырмын!* Б. Бикбай.

● *Таныған ерҙә ир һыйлы, танымаған ерҙә тун һыйлы.* Мәҡәл.

**ТАНЫУ** [2] (тан*) *к.* Эшләгән эшеңдән йәки әйткән һүҙеңдән баш тартып, кире ҡағыу. *Ант итеп таныу. Танмай һөйләп биреү.* ■ *«Әллә Ғәзелгә күҙең төштөмө?» — тиҙәр... Мин йәш ҡыҙҙар шикелле ҡыҙарып-бүртенеп, оялып китәм. Илай яҙып танам.* З. Биишева. *[Нигмәтулла:] Быгаса мин дә үҙем өсөн йәшәнем. Тан-*

*майым. Эммэ киләсәктә улай булмаясаҡ.* Я. Хамматов.

**ТАНЫУЛЫ** *с.* Танылып торған; билдәле. *Таныулы мал. Таныулы нәмә.*

**ТАНЫШ** *с.* **1.** Күреп, ишетеп белгән; билдәле. *Таныш исем. Таныш йыр. Таныш кеше. Таныш ҡала. Таныш юл.* ■ *Адресың миңә таныш түгел, исемең дә былай ят һымаҡ.* Я. Ҡолмой. *[Егеткә] тауҙағы һәр бер ҡая таш, һәр бер йәнлек һуҡмағы таныш булған* (Әкиәттән).

**2.** *и. мәғ.* Күргән-белгән кеше. *Уның таныштары күп. Таныштьı осратыу.*

♦ **Таныш булығыҙ** (*йәки* **булайыҡ**) танышҡанда йәки таныштырғанда әйтелә. *Ҡыҙ ҡул һуҙҙы: «Таныш булайыҡ, мин — Наилә»,— тине.* С. Агиш.

● *Бер күргән — белеш, ике күргән — таныш.* Мәҡәл.

**ТАНЫШ-БЕЛЕШ** *и. йыйн.* Күргән-белгән кешеләр; таныштар. *[Зөләйха:] Унда артыҡ кеше юҡ, таныш-белеш кенә.* Т. Йәнәби.

**ТАНЫЛШЫҠ** *и.* **1.** Үҙ-ара таныш булыуға бәйле мөнәсәбәт, таныш булған хәл. *Беҙҙең танышлыҡ та .. ошо исемдәр оҡшашлығынан башланып китте.* З. Биишева.

**2.** Төрлө эш, ярҙам өсөн файҙаланылған яҡын мөнәсәбәт. *Иванов ҡыҙы Нинаны танышлыҡ арҡаһында гимназияға индергән.* Д. Юлтый.

**ТАНЫШМАҠЛЫ** *с. һөйл.* Бик тиҙ танышыусан, тиҙ аралашыусан. *Үҙ ғүмеремдә беренсе мәртәбә ошондай йышылған, .. танышмаҡлы .. әҙәм менән күрәшәм.* «Ағиҙел», 1971, № 3.

**ТАНЫШ-ТОНОШ** *и. йыйн. һөйл.* Таныш булған төрлө кеше; таныш-белеш.

**ТАНЫШТЫРЫУ** *к.* **1.** Кемдәрҙелер бер-беренә әйтеп, күрһәтеп таныш итеү. *Сәлмән ағай мине бер нисә ҡыҙ һәм егет менән таныштырып алды.* Т. Йәнәби.

**2.** Низер тураһында мәғлүмәт биреп, билдәле итеү. *Эш менән таныштырыу.* ■ *Титов һалдаттарҙы бындағы хәл менән таныштырҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**ТАНЫШЫУ** *к.* **1.** Үҙ-ара танышлыҡ булдырыу. *Яҡындан танышыу.* ■*Борон башҡорт ят кеше менән танышырға теләһә: — Ағасың нимә?.. Тамғаң нимә?.. Ҡошоң нимә?.. — тип һораған.* Ш. Шәһәр. *Ғафури менән шәхсән танышып, серләшеп, ҡайғы һәм шатлыҡтарҙы уртаҡлашып китмәксе булам.* С. Ҡудаш.

**2.** Низер тураһында мәғлүмәт алыу; күреп, ишетеп белеү. *Китап менән танышыу. Ҡала менән танышыу.* ■ *Батша Өйрәнсекте үҙ һарайына саҡыртып алған. Уның тормошо, эше менән ентекләп танышҡан.* З. Биишева.

● *Ат кешенләшеп табышыр, әҙәм һөйләшеп танышыр.* Мәҡәл.

**ТАҢ**[1] *и.* **1.** Тәүлектең ҡояш сығыр алдынан яҡтыра башлаған ваҡыты һәм шул саҡтағы көнсығыш тараф. *Йәйге таң. Таң алды. Таң еле. Таң йоҡоһо. Таң ҡараңғылығы. Таң һалҡыны. Иртә таңдан. Таң менән. Таң беленеү.* ■ *Һыҙылып ҡына ал таң атты, иренеп кенә аҡ ай батты.* Д. Юлтый. **Ала таң** ҡараңғылы-яҡтылы булып, таң беленә башлаған саҡ. *Ала таңдан эшкә тотоноу.* **Ҡара таңдан ҡара кискә тиклем** иртә таңдан төнгә саҡлы. *Ҡара таңдан ҡара кискә тиклем эшләү.* **Ҡара таңдан** *йәки* **таң ҡараңғыһынан** бик иртә, таң беленмәҫ элек. *Көтөү эше еңел түгел ине. Баярҙың малын таң ҡараңғыһынан тороп яланға ҡыуырға кәрәк.* Һ. Дәүләтшина. **Таң аттырыу** йоҡламай таңды еткереү. *Ә мин тышта, һыуыҡ бурандарҙа таң аттырҙым туңған көйөмә.* Ғ. Амантай. **Таң атыу** таң яҡтырыу. *Офоҡто алһыу нурға мансып, һыҙылып таң атты.* Р. Йәнбәков. **Таң ҡыҙарыу** ҡыҙыл булып таң беленеү. *Таң ҡыҙарып килә, ҡайт егет* (Халыҡ йырынан). **Таң ҡыйылыу** (*йәки* **һыҙылыу**) таң беленә башлау. **Таң тишегенән** *һөйл.* бик иртә, таң атыратмаҫ борон. **Таң һарыһы** *йәки* **һары таң** ҡояш ҡалҡыр алдынан булған ваҡыт һәм ошо ваҡыттағы офоҡтағы яҡтылыҡ. *Һары таң атты.* ■ *Таң һарыһы ҡар өҫтөн зәңгәрһыулатып ебәрҙе, яңы ғына үткән ҡуян эҙҙәре күренә башланы.* Ғ. Шәрипов. **Һары таңдан** *йәки* **таң һарыһынан** таң беленгәс тә, бик иртә. *Таң һарыһынан юлға сығыу.*

**2.** *ҡусм.* Низеңдер башланғыс ваҡыты. *Бына бөгөн, йәшлек таңымда, сәскә атты бер гөл тағы ла.* Ғ. Амантай.

♦ **Таң йондоҙо** *ҡар.* **сулпан 1.**

**ТАҢ**[2] *и.* Иҫ киткес нәмә, ғәжәп хәл. *Күҙәтселәр хәбәр бирҙе, саң күрҙек, тип, саң эсендә .. таң күрҙек, тип* «Бабсаҡ менән Күсәк».

□ **Таң(ға) ҡалыу** аптырау, ғәжәпкә ҡалыу. *Таң ҡалам мин тауышыңа: ниндәй тылсымлы тауыш.* Ш. Бабич.

● *Күргәнгә һаҡал таң, күрмәнгә күҫә таң.* Мәҡәл.

**ТАҢАРТЫУ** *к. диал.* Таңды еткереү, таң аттырыу. *Һөйләшеп ятып таңарттыҡ.*

**ТАҢАТЫУ** *к.* Шәп килеп янған атты үлән менән дауалап, кистән таңға хәтле ашатмай-эсермәй ҡуйыу.

**ТАҢАШЫРЫУ** *к. ҡар.* **таңатыу.**

**ТАҢҒАЙ** *и. диал.* Таңлай.

**ТАҢҒАРЫ** *р. һөйл.* Таң атыуға, таңға табан. *Таңғары юлға сығыу.*

**ТАҢҒЫ** *с.* Таң ваҡытындағы. *Таңғы йомшаҡ ел.*

**ТАҢҒЫР-ТОҢҒОР** *оҡш. ҡар.* **даңғыр-доңғор.**

**ТАҢ-ҒӘЖӘП:** **таң-ғәжәпкә ҡалыу** бик ныҡ аптырау. *[Байгужа:] Шуны аңламай, таңғәжәпкә ҡалып ултырам әле.* Д. Юлтый.

**ТАҢДАҠ** *и. диал.* Шаңдаҡ.

**ТАҢ-ИРТӘ** *и.* Иртә таң, таң ваҡыты. *Таңиртәнән тороп [Нурый] эшкә китә, кисен көлөп ҡайта арыһа ла.* Б. Ишемғол.

**ТАҢҠАН** *и. һөйл.* Нәҙек оҙон муйынлы суйын ҡомған.

**ТАҢҠЫЛДАҠ** *с. һөйл.* Күп һөйләүсән. *Таңҡылдаҡ ҡатын.*

**ТАҢҠЫЛДАУ** *к.* Өгөтләп, күндерергә тырышып, ҡабат-ҡабат бер һүҙҙе һөйләү. **Таңҡылдап илау** нәмәләр әйтә-әйтә, таҡмаҡлап илау.

**ТАҢҠЫУ** *к. диал.* Таңҡылдау.

**ТАҢЛАЙ** *и.* Ауыҙ ҡыуышлығының өҫкө яғы; йомшаҡ аңҡау.

**ТАҢЛАНЫУ**[1] *к. иҫк.* Таң(ға) ҡалыу, аптырау. *Күреп таңланыу.*

**ТАҢЛАНЫУ** [2] *к. кайт. кар.* **таңлау.** *Таңланып йөрөү.*

**ТАҢЛАУ** *к.* Ниҙер табырға теләп төрлө ерҙән ҡарау; эҙләү. *[Юлдыҡай:] Күп таңланым илдә ҡыҙ яҡшыһын, Ынйыҡайҙай һылыу булманы.* Х. Ғәбитов.

● *Таңлаған — таҙға, таянған боҙға.* Мәҡәл.

**ТАҢҺЫНЫУ** *к.* Ғәжәп күреү, ғәжәп итеү; һоҡланыу. *Ә Таңсулпан шул ҡоштарға ҡарап, сихри яҙ күркенә таңһынып, тау үңерендә, сәс толомон услап, баҫып торҙо япа-яңғыҙы.* М. Тажи.

**ТАҢҺЫНЫШЫУ** *к. урт. кар.* **таңһыныу.** *Таңһынышып ҡарау.*

**ТАҢҺЫУ** *с. диал.* Аңра.

**ТАҢЫРҠАУ** *к. диал.* Ғәжәпкә ҡалыу, аптырау. *Таңырҡап тороу.*

**ТАҢЫУ** (таңы*ғ*) *к.* Кешене юлға оҙатыу айҡанлы ҡунаҡ саҡырып, мәжлес ҡороу. *[Хәмди:] Гөлбостан килен, бынауы кеүек ҡаҡ юлда арбанан ҡолап, Аҡнаҙарҙың башы ярылыр, алла һаҡлаһын! Ҡана, картыңдың башын таңып алайыҡсы әле.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТАП** [1] *и.* **1.** Ниҙер тейеүҙән, буялыуҙан ҡалған эҙ. *Буяу табы. Дегет табы. Май табы. Тап тейеү.* ■ *Үлән өҫтө ҡан таптары менән сыланған.* С. Кулибай. *Һай, аҡ күрҙем, аҡ күрҙем, аҡта ҡара тап күрҙем.* «Аҡбуҙат». / Ай һәм Ҡояш йөҙөндә күренгән тимгелдәр. *Айҙағы тап.* ■ *Ер үҙе лә булмай соҡорһоҙ, Ҡояштың да бар бит ҙур табы.* М. Хәй.

**2.** (*йәки* **ҡара тап**) *күсм.* Оят килтерерҙәй, хур итерҙәй нәмә; кер. *Үҙендәге ҡара тапты үҙе йыумаған кеше ниндәй ир булһын.* Н. Мусин. **Тап төшөрөү** хурлыҡ килтереү, оятлы итеү. *Исемгә тап төшөрөү. Намыҫҡа тап төшөрөү.* ■ *Һөйләгән дә кеше һөйләй бирһен, тап төшөрмәм нурлы йөҙөңә* (Халыҡ йырынан).

**ТАП** [2] *и.* Үткер нәмә менән сапҡанда йәки юнғанда төшкән ағас кисәге. *Ҡоро тап. Тап йыйыу. Тап яғыу.* ■ *Ҡарағай таптары .. ялпылдап ергә оса.* Й. Солтанов.

**ТАП** [3] *и. иҫк.* Халыҡ төркөмө. *Кире аҙамат йорт көтһә, таптың йөҙөнә төкөрөр* (Ҡобайырҙан).

**ТАП** [4] *киҫ.* Һөйләмдә ниндәйҙер бер һүҙгә, фекергә баҫым яһап, уның мәғәнәһен көсәйтә; нәҡ. *Тап төш уртаһында. Тап шул мәлдә. Тап үҙе. Тап ошо кеше.* ■ *Төн уртаһы еткәндә, Сәйет батырҙары тап Аҡмәмбәт йылҡыһы ятҡан ергә барып сыға* (Легенданан). / Сағыштырыу, оҡшатыуҙы көсәйтеп килә; тас, нәҡ. *Тап боронғоса. Тап арыҫлан кеүек.* ■ *Ирйегет тә тап ошо .. Аҙнағол кеүек һөйкөмлө, мөләйем кеше ине бит.* З. Биишева.

**ТАП** [5] *окш.* Артыҡ ауыр булмаған нәмә ҡаты урынға төшкәндә йәки һуғылғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Тап итеп ҡалыу.*

**ТАП** [6]: **тап булыу** кем йәки нимәлер осрау, юлда тура килеү. **Тап итеү** осратыу, тура килтереү. *Тап итеп һөйләшеү.* **Тап килеү** 1) бер эш-хәлдең урыны, ваҡытына тура килеү. *Байрамға тап килеү. Эш ваҡытына тап килеү;* 2) сифат, рәүеш йәһәтенән тура килеү. *Улар төҫтәре менән генә түгел, ҡылыҡтары менән дә тап килгән.* Б. Бикбай; 3) осрашыу, тап булыу. *Ҡара-ҡаршы тап килеү.*

● *Бүренән ҡасҡан айыуға тап булған.* Мәҡәл.

**ТАП-** *киҫ.* **Та***ғ* ижеге менән башланған төп сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһен бирә. *Тап-таҙа. Тап-таҡыр. Тап-таман.*

**ТАПАҠАЙ** *с. диал. кар.* **төпөш** [1].

**ТАПАЛАҠ** *и. диал. кар.* **һәпәләк** [1].

**ТАПАЛАН** *и. диал. кар.* **тапам** 1.

**ТАПАЛАТЫУ** *к.* Арттан төшөп ҡыуыу, баҫтырыу. *Ул арала [аҡтарҙы] ҡыҙылдар тапалатып килеп, сығарып ебәргән.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТАПАЛАУ** *к. һөйл.* **1.** Өҫтән ҡабат-ҡабат баҫып, өҫтөндә йөрөп тығыҙлау; тапау. *Тапалап өйөү. Тапалап бесән тултырыу.*

**2.** Нимәнеңдер өҫтөнә баҫып үтеү, өҫтөндә йөрөү, тапау. *[Гөлбостан:] Анау балалар ни ... йәшенмәк уйнап, шаршау артына йәшенеп, тапалап, ылҡаһын ҡалдырмай, бауҙарын өҙөп бөттө.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** *кар.* **тапау** [1] 2. *Бесәнлекте тапалау.*

**4.** *диал. кар.* **тапау** [1] 6. *Арҡаһынан тапалап һөйөү.*

**ТАПАЛТАҠ** *с. диал. кар.* **төпөш** [1]. *Тапалтаҡ кеше.*

**ТАПАЛЫУ** *к. төш. кар.* **тапау** [1] 1—5, 7, 8. *Тапалған ер. Тапалған салғы. Тапалған иҙән. Машинаға тапалыу.*

**ТАПАМ** *и.* **1.** Мал йөрөгән урын, тапанды ер.

**2.** *иҫк.* Иген һуғыу эше (ғәҙәттә түшәлгән иген өҫтөндә ниҙер йөрөтөү юлы менән башҡарылған). *Гөлйөҙөм .. Тимербулатты ат ҡыуырға алып, ҡарт-ҡамҡылар менән тапам эшенә тотоноп киттеләр.* Һ. Дәүләтшина. **Тапам машинаһы** молотилка.

**ТАПАМА** [1] *и. кар.* **тапам** 2.

**ТАПАМА** [2] *с. диал. кар.* **тапанды** 2. *Тапама бесән.*

**ТАПАМА** [3] *и. диал. кар.* **көмбәҙ** [2] 1.

**ТАПАНДЫ** *с.* **1.** Тапап таҡырланған. *Тапанды ер. Тапанды юл. // Малды тапандыла йөрөтөү.* ■ *Әхмәҙи һыу буйлап килеп, Ташбатҡан ауылының үргә осондағы тапандыға, мал ургылай торған тирһәнгә килеп сыҡты.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Мал ашап тапағандан ҡалған. *Тапанды һалам. // Мал аҫтына тапанды һалыу.*

**ТАПАНЫУ** *к.* Аяҡтарҙы бер урында алмаштилмәш баҫҡылау. *Аттар ҡапыл туҡтаны, ауыҙлыҡтарын сәйнәп бышҡыра-бышҡыра бер урында тапанып тик торҙолар.* Я. Хамматов. *Ниңә тағы ҡапҡа төбөгөҙҙә мин торамын әле тапанып?* Р. Бикбаев.

◆ **Бер урында тапаныу** эш-тормошта алға бармай, бер кимәлдә ҡалыу. *Эш һүлпән барҙы, колхоз бер урында тапанды.* «Ағиҙел», 1980, № 5.

**ТАПАТЫУ** *к.* **1.** Ниҙеңдер өҫтөндә йөрөтөү, тапарға мәжбүр итеү. *Сабынлыҡты тапатыу.* ■ *Анау йүнһеҙ көтөүсе малай малынан кәберлекте тапатҡан.* Ә. Вахитов.

**2.** *иҫк.* Ырҙынға түшәлгән көлтәләр өҫтөнән ниҙер йөрөтөп, ашлыҡ һуғыу. *Иген тапатыу. Арыш тапатыу.* ■ *Беҙ Ҡушағас тауҙың битендә тары тапата инек.* Б. Хәсән. / Балсыҡ, тиҙәктең өҫтөнән йөрөтөп иҙҙереү, йомшартыу.

**3.** Ни менәндер баҫып үтеү, имгәтеү, һәләк итеү. *Ат менән тапатыу. Машина менән тапатыу.* ■ *Ҡаҙаҡтар ҡамсыларын һелтәп ҡаса башланылар. Бер һалдатты тапаттылар.* Д. Юлтый.

**ТАПАУ**[1] *ҡ.* **1.** Үткәндә йәки йөрөгәндә өҫтән баҫып үтеү. *Кейемде тапап йөрөү.* ■ *[Тимербулат] туҙған китаптарын тапай-тапай урындыҡ буйлап йүгерҙе.* Һ. Дәүләтшина. / Өҫтән ҡабат-ҡабат баҫып, өҫтөндә йөрөп тығыҙлау. *Бесәнде тапап тейәү. Кәбәнде тапап һалыу.* / *күсм. шаяр.* Бейеү. *[Бибей:] Бер-ике тапап алайыгыҙ, иптәштәр.* М. Тажи.

**2.** Өҫтөндә йөрөп иҙеү, боҙоу. *Сабынлыкты тапау.* ■ *Игенде тапау.* / Өҫтөндә йөрөп бысратыу, эҙ ҡалдырыу. *Иҙәнде тапау.* / *күсм.* Нимәнеңдер ҡәҙерен белмәү, иғтибар итмәй ҡәҙерһеҙләү. *Ерҙә торғанбыҙ, байлыкты тапап йөрөгәнбеҙ.* Б. Бикбай. / *күсм.* Мыҫҡыллау, хурлау; түбәнһетеү. *Дуҫлыкты беҙ яттарға һис бирмәбеҙ тапарга.* Х. Ғиләжев.

**3.** Өҫтөнән баҫып үтеп имгәтеү, һәләк итеү. *Енләнеп гәскәр кеүек йөрөй был атлылар. Сыкма урамға йәйәө, сыкһаң әгәр, тапарҙар.* Ш. Бабич. *[Малдар] бер-береһен тапарҙай булып өркөшөп, .. күлгә сумышып бөткәндәр ҙә ҡуйғандар.* «Аҡбуҙат».

**4.** *иҫк.* Йәгән һаламлы игенде ни менәндер өҫтән йөрөтөп орлоғон төшөрөү; баҫыу. *Арыш тапау. Тапауға кеше яллау. Тапауға сығыу.* / Балсыҡ, итҙәктең өҫтөнән йөрөп иҙеү, йомшартыу. *Балсык тапау. Тиҙәк тапарга кеше сакырыу.*

**5.** Берәй урында күп тапҡыр булыу, берәй урында ҡабат-ҡабат үтеү. *[Малай:] Бер бөгөн ат башы тоткан кеше түгелмен бит әлетыуғаны бире мең мәртәбә тапап үткән юл.* М. Тажи. *Ул илдәрҙе мин дә беләмен бит, аҙ тапаныммы ни уларҙы.* В. Әхмәҙиев.

**6.** Һөйгәндә яурын йәки арҡаға ҡул менән йомшаҡ ҡына һуҡҡылау, ҡағыу. *Арканан тапап иркәләү. Яурындан тапап һөйөү.* ■ *Ғумәровтың калған балаларын, кемдәр тапап, кем һөйөр* (Халыҡ йырынан).

**7.** Сүкеш менән һуғым салғының йөҙөн йоҡартыу. *Сең-сең иткән тауышка уянып киттем. Тышка сыкһам әсәйем салғы тапап ултыра икән.* Я. Вәлиев.

**8.** Үткер нәмә менән сапҡылап ваҡлау. *Йәшелсә тапау.* ■ *Ғабдулла .. билмәнгә ит тапарга тотонд.* Д. Исламов.

◆ **Алып маҡтарлыҡ, һалып тапарлыҡ түгел** маҡтарлыҡ та яманларлыҡ та түгел, уртаса тигән мәғәнәлә әйтелә. **Аяҡ аҫтына һалып тапау** *кар.* **аяҡ**[1]. **Урам тапау** эшһеҙ урам ҡыҙырып йөрөү. Мәхмүзә эшкә тотонорға бер ҙә уйламай. Биҙәнеп-төҙәнеп ала ла, урам тапай. Д. Исламов. **Тупһа тапау** *кар.* **тупһа.**

**ТАПАУ**[2] *с. диал.* Тапанды.

**ТАПАУЫС** *и.* **1.** Салғы сүкей торған сүкеш.

**2.** Үткер беҙле бәләкәй көрәк рәүешендәге ит, йәшелсә тапап ваҡлай торған ҡорал.

**3.** Ит, йәшелсә һалып тапай торған озонса ағас һауыт.

**ТАПИР** [*рус.*] *и.* Америка һәм Көньяҡ-көнсығыш Ахия тропигында йәшәй торған оҙон итләс томшоҡло, йомро тояҡлы һөтимәр хайуан.

**ТАПҠАҠЛАУ** *ҡ.* **1.** *һөйл.* Тояғы ашалып атлай алмаҫ булыу. *Тапкаклаган ат.*

**2.** *диал. кар.* **тубырлау**[1].

**ТАПҠАН-ТАЯНҒАН** *и. йыйн.* Эшләп тапҡан, йүнләгән бөтә мал-мөлкәт. *Тапкан-таянганды бөтөрөп тороу.*

**ТАПҠЫР**[1] *и.* Кем йәки нимәгәләр ҡаршы ятҡан урын, кем йәки нимәнеңдер турыһы; тәңгәл. *Ауыл тапкыры. Өй тапкыры.* ■ *Колхоздың өсөнсө бригадаһы Ҡара ятыу тапкырындағы тау артында куна ятып, һабан һөрә башланы.* И. Насыри.

**ТАПҠЫР**[2] *с.* **1.** Ситкә тайпылышһыҙ; тура. *Тапкыр юл. // Тапкыр килеү. Тапкыр сығыу.* ■ *Был ат иленә тапкыр кайтманы, ти, башта ашаған еренә барҙы, ти* (Әкиәттән).

**2.** Мәғәнәһе менән тура килеп торған үткер эстәлекле. *Тапкыр мәкәл. Тапкыр яуап. // Тапкыр әйтеү. Тапкыр яуап биреү.* ■ *[Йәнтимер] миңә бик тапкыр ... әсе һүҙ әҙләй кеүек күренә.* С. Агиш.

**3.** Зирәк аҡыллы, йор һүҙле, сос. *Тапкыр егет.* ■ *Сәлмән эшкә өлгөр: йомошка тилбер, һүҙгә тапкыр, уйға откор булған* (Әкиәттән).

◆ **Тапҡыр һүҙ** башҡорт халыҡ ижадының ҡыҫҡа ғына итеп, үткер, дөрөҫ фекер әйтә торған төрө.

**ТАПҠЫР**[3] *и.* Һан һәм һорау алмаштары менән килеп, эш-хәлдең ҡабатланыу иҫәбен белдерә; ҡабат. *Беренсе тапкыр. Һуңғы тапкыр. Ике тапкыр. Күп тапкыр. Нисә тапкыр. Өсдүрт тапкыр. Тәү тапкыр.* ■ *[Солтан] ике ботло гер ташын һыңар кулы менән генә утыҙ тапкыр күккә сөйә.* В. Исхаҡов.

◆ **Бер тапҡыр** бер ваҡыт.

**ТАПҠЫРЛАУ**[1] *ҡ.* **1.** Йүнәлеште билдәле бер нәмәгә туралау; тәңгәлләү. *Ауылға тапкырлап барыу.*

**2.** Хәрәкәт йүнәлешен билдәләү. *Фронттың кайһы якка киткәнен тапкырлау кыйын.* А. Таһиров.

**ТАПҠЫРЛАУ**[2] *ҡ. мат.* Билдәле бер һанға ҡабатлау; арттырыу. *Өскә тапкырлау.*

**ТАПҠЫРЛАШ** *с. һөйл.* Үҙ-ара ҡара-ҡаршы булған. *Тапкырлаш өйҙәр. // Тапкырлаш йәшәү.*

**ТАПҠЫРЛАШЫУ** *ҡ.* Кем йәки нимәнеңдер тапҡырына килеү, тәңгәләнә етеү. *[Өлкәман бай] имәнгә тапкырлашкас, Айрас этен һөсләтте.* Ш. Насыров.

**ТАПҠЫРЛЫҠ** *и.* Берәй нәмәне хәл итеүҙәге зирәклек, сослоҡ. *[Ауылдаштарым] бөтәһе лә тиерлек Бабичты маҡтанылар. Уның тапкырлығына, зирәклегенә .. һокландылар.* С. Ҡудаш.

**ТАПЛАҠ** *и.* Тары ярмаһын киләлә төйөп, баллы һөт ҡушып яһаған ашамлыҡ.

**ТАПЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Тап тейҙереү, таплы итеү. *Кейемде тапландырыу.*

**ТАПЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Тап тейеп бысрау. *Тапланган кейем.*

**2.** *күсм.* Хурлыҡ килеү, тап төшөү, бысрау. *Саф иман тапланмаһа, тәкдир аяк салмаһа, нурлы йондоҙҙарҙан да нурлы ялтырармын алда мин.* Ш. Бабич.

**ТАПЛАТЫУ** *к.* **1.** Тап тейҙереп бысратыу, тап төшөртөү.

**2.** *күсм.* Оятлы итеү, хурлыҡ менән бысраттырыу. *Аҡ күңелде таплатып, киммәт нимыҫты тапатып, торма ерҙә эй, бөйөк выждан, йыйын шайтан менән!* Ш. Бабич.

**ТАПЛАУ** *к.* **1.** Тап тейҙереп бысратыу. *Кейемде таплау.*

**2.** *күсм.* Оят, хурлыҡ килтереп бысратыу. *Намыҫты таплау.* ■ *Тик һаҡлай бел уның бөйөклөгөн, таплама һин һөйөү паклыгын.* Ә. Таһирова.

**ТАПЛЫ** *с.* Тап төшкән. *Кеше гүмере балаһаға дәфтәре түгел, уның таплы биттәрен йыртып ташлап булмай.* Д. Исламов.

**ТАПЛЫҠ** *и. диал.* Утынлыҡ.

**ТАПМА** *и.* Бер өшөтөп, бер яндырып ҡалтырата торған йоғошло, дауамлы ауырыу. *Тапма ... микробтарын кешегә анофелес тигән серәкәй йоҡтора.* В. Ғүмәров. **Тапма табыу** тапма менән ауырыу. **Тапма тотоу** 1) тапма ауырыуы эләгәү, тапма өйәнәге сығыу; 2) *күсм.* ҡапыл ҡыҙып ныҡ ярһыу. **Һары тапма** тропик илдәрҙәге йоғошло ҡаты ауырыу.

◆ **Аҡ тапма** алкоголиктарға хас илерек ауырыуы.

**ТА́ПОЧКА** [*рус.*] *и.* Өйҙә кейә торған еңел аяҡ кейеме.

**ТАПСЫҠ** *и. диал. ҡар.* **тап**[2].

**ТАПТАУ** *к. диал. ҡар.* **тапау**[1].

**ТАП-ТОП**[1] *и. йыйн.* Ағастан юнылып төшкән төрлө киҫәк, төрлө тап. *[Хәлкәс:] Илгиҙәр, бар улым, утынлыҡтан тап-топ йыйып килтер. Самауырҙы шыжлатып ебәрәйек.* Ш. Бикҡол.

**ТАП-ТОП**[2], **тап та топ** *окш.* Ҡабат-ҡабат тап иткән тауышты белдергән һүҙ. *Тап-топ итеү. Тап-топ килеү. Тап-топ баҫыу.*

**ТАПТЫРЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **табыу** 1, 3, 4, 8. *Ашарға таптырыу. Юкты таптырыу.*

● *Ҡунаҡ һорамай таптыра.* Мәкәл.

**ТАПШАУЫР** *с. диал.* Мыштыр, ығыш.

**ТАПШАУЫРЛАУ** *к. диал.* Мыштырлау.

**ТАПШЫРТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **тапшырыу**[1]. *Хатты тапшыртыу. Игенде тапшыртыу.*

**ТАПШЫРЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **тапшырыу**[1]. *Радио аша тапшырылган хәбәр. Эш тәжрибәле кешеләргә тапшырылды. Йорт файҙаланыуга тапшырылды.*

**ТАПШЫРЫУ**[1] *к.* **1.** Кемдеңдер ҡулына, ҡарамағына биреү. *Фәхри.., утынын тиҙ генә этәтөртә бушатып, атты конюхҡа тапшырырга китте.* Б. Бикбай. *[Ҡарт:] Улым, был уҡ-һаҙаҡ менән балта миңә олатайымдан ҡалган. Уларҙы мин һиңә тапшырам* (Әкиәттән). / Кемдер тарафынан ҡушылғанды әйтеү, биреү һ. б. *Сәләм тапшырыу. Хат тапшырыу.* ■ *Мәгфүрә Шәһиҙә әбейгә Айбулаттың үтенесен тапшырҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Закон, договор, вазифа буйынса тейеш булғанды дәүләткә йәки рәсми ойошмаға биреү. *Дәүләткә иген тапшырыу. Һөт тапшырыу. Ҡоралды тапшырыу.* ■ *Беҙҙең мылтыҡтар юк ине. Барыһын да йыйгайнылар. Аҙактан .. патрондарҙы тапшырырга ҡуштылар.* Д. Юлтый. / Кемдер йәки ниҙер ҡарамағына биреү. *Вазифаны тапшырыу. Власты тапшырыу. Дежурлыҡты тапшырыу. Хужалыкты тапшырыу. Эш ҡагыҙҙарын тапшырыу.* / Эшкә, ҡулланыуға әҙер итеп файҙаланырға биреү. *Заводты тапшырыу. Цехты файҙаланыуга тапшырыу.*

**3.** Эш-белем кимәлен тикшергән һорауға яуап биреү. *Имтихан тапшырыу. Һынау тапшырыу.*

**4.** Берәй эште кем йәки нимәлер өҫтөнә йөкмәтеү. *[Рәхимә — Хөсәйенгә:] Нишләп .. Айбулат үҙенә ҡушылган йомошто һиңә тапшырып йөрөй.* Һ. Дәүләтшина. *[Батша:] Үҙем әйтә алмайым. Мин был эште хөкөмселәргә тапшырам* (Әкиәттән). / Кем йәки нимәнеңдер ҡарамағына, ихтыярына биреү, ҡалдырыу. *Донъяны үҙ йөрәгеңә һыйҙырыу — үҙеңде тыуған ереңә, кешеләргә ышанып тапшырыу тигән һүҙ.* Ә. Вәхитов.

**5.** *тех.* Хәрәкәт йәки энергияны бер урындан икенсегә төрлө юл менән күсереү. *Тапшырыу механизмы.*

**6.** Радио һәм телевидение аша халыҡҡа еткереү, ишеттереү. *Радионан күңелле көйҙәр тапшыралар.*

**ТАПШЫРЫУ**[2] *и.* Радио йәки телевидение аша бирелгән хәбәр, һүрәтләмә, музыка һ. б. *Музыкаль тапшырыуҙар. Радио тапшырыуҙары. Телевидение тапшырыуҙары.*

◆ **Аллаға тапшырыу** *ҡар.* **алла.**

**ТАПЫ** *и. диал. ҡар.* **тап**[1] 1.

**ТАПЫЛДАТЫУ** *к.* Тап-топ иттереү, тап-топ иткән тауыш сығарыу. *[Иштуган менән Ғимранов] ҡосаҡлашып, арҡаларынан тапылдатып һөйөшөп күрештеләр.* З. Биишева.

**ТАПЫЛДАУ** *к.* Тап итеү, тап-топ итеү, тап-топ килеү. *Бер һыбай кеше быларга тапылдап етеп тә килә.* Т. Йәнәби.

**ТАПЫРЛАУ** *к.* Тапыр-топор итеү, тапыр-топор килеү. *Тапырлап йүгереү.*

**ТАПЫРЛАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **тапырлау.** *Тапырлашып килеү.*

**ТАПЫР-ТОПОР** *окш.* Күмәк кеше йәки мал аяғының тауышын белдергән һүҙ. *Тапыр-топор сабыу. Тапыр-топор йүгереү.* ■ *Алтын башаҡ игенде ырҙындарҙа баҫырбыҙ, тапыр-топор юрттырып, аҙбарҙарга ташырбыҙ.* Ғ. Амантай.

**ТАПЫРЫҠ**[1] *и.* Сат быуыны. *Тапырыҡ һөйәге. Тапырыгы айырылган.*

**ТАПЫРЫҠ**[2] *с. диал. ҡар.* **бысраҡ**[2] 2.

**ТАР** *с.* **1.** Иңе, киңлеге бәләкәй; *киреһе* киң. *Тар таҫма. Тар таҡта. Тар урам. Тар юл. Тар ауыҙлы һауыт.* ■ *Тар гына, тоноҡ, агын һыу буйында баҡсабыҙ.* Ш. Бабич. *Киң түгайҙар тар төҫлө тойола. Күмәк тормош гөрләй яланда.* Т. Йәнәби.

**2.** Ян-яғы ҡыҫынҡы; *киреһе* иркен. *Тар бүлмә. Урын тар булыу.* ■ *Ҡайҙа киттегеҙ һеҙ шигырҙарым? Зәңгәр төтөн йөҙгән тар бүлмәлә нисәнсе төн һеҙҙе көтәмен.* М. Кәрим. / Ҡыҫып, кипсәлеп торған, тығыҙ (кейемгә ҡарата). *Тар еңле күлдәк. Тар итеп тегеү.* ■ *Донъя киңлегенән ни файҙа, аяҡ кейемдәрең тар булгас.* Д. Юлтый.

**3.** *күсм.* Ирек, мөмкинлек йәһәтенән сикле. *Тар донъя. Вакыт тар булыу.* ■ *Беҙҙең илгә герой кәрәк, данлы кешеләр, ә ундайҙар,*

иптәш, тыумай тар семьялар эсендә. Ғ. Сәләм.

♦ **Тар ергә тана башы** *кар.* **тана. Тар ергә таяу** *кар.* **таяу** ². **Тар күңелле** (*йәки* **эсле**) *кар.* **күңел** 3. **Тар ҡарашлы** донъяға ҡарашы, ысынбарлыҡты аңлау, баһалау һәләте сикле булған.

**ТА́РА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Төрлө нәмә һалып ҡуя, һалып ташый торған һауыт (тоҡ, ҡап, йәшник һ. б.). *Тара эшләү.*

**2.** Төрлө нәмә һалынған һауыт, йөк тейәгән машина, вагондың ауырлығы.

**ТАРАЙТТЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **тарайтыу.** *Күлдәкте тарайттырыу.*

**ТАРАЙТЫУ** *к.* Тарға әйләндереү, тар итеү. *Итәкте тарайтыу. Таҡтаны тарайтыу.*

**ТАРАЙЫУ** *к.* **1.** Иңе, киңлеге бәләкәсләнеү; тар булыу. *Бер киңәйеп, бер тарайып киткән юл .. Верхнеуралға килә.* К. Мәргән.

**2.** Ян-яҡтан ҡыҫынҡыланып иркенлеге бөтөү, тарға әйләнеү. *Урын тарайҙы.* ■ *[Тараyыл:] Урал киң булһа ла, балам, беҙгә хәҙер ул да тарайҙы: төйәктәребеҙҙән ҡыуҙы Мәсем хан.* С. Мифтахов. / Кипсәү, ҡыҫтауға әйләнеү, тығыҙ булыу (кейемгә ҡарата). *Сәғиҙәнең.., пальтоһы әллә нисек тарайып, тыны ҡыҫыла башланы.* М. Тажи.

**3.** *күсм.* Ирек, мөмкинлек йәһәтенән сикләнгән булыу, тарға әйләнеү. *Эш күбәйҙе, ваҡыт тарайҙы.*

**ТАРАҠ** *и.* **1.** Сәсте тарап яҙа торған тешле-тешле ҡорал. *Ағас тараҡ. Мөгөҙ тараҡ. Тимер тараҡ. Ваҡ тараҡ. Эре тараҡ.* ■ *Башҡынайым тарайым, тарағын ҡайҙан алайым* (Халыҡ йырынан). **Баш тарағы** бер яғы эре, бер яғы ваҡ тешле гигиена маҡсатында ҡулланылған тараҡ. **Кәзә тарағы** кәзә дебетен тарап ала торған кәкре оҙон тешле тараҡ. **Кәкре тараҡ** сәскә ҡаҙап ҡуя торған тараҡ; сәс тарағы.

**2.** Буйлыҡҡа үткәрелгән арҡауҙы ҡыҫып тығыҙлай торған тешле-тешле ҡорал; ҡылыс.

♦ **Тараҡ теш** *кар.* **теш**¹ 1. **Тәрәш тараҡ** *кар.* **тәрәш** 2.

**ТАРАҠАН** *и.* Кеше торлағында йәшәгән ерән төҫтәге оҙон мыйыҡлы бөжәк. **Ҡара тараҡан** ҡара төҫтәге ҙур тараҡан. **Тараҡан ҡатырыу** ҡышҡы һыуыҡта өйҙө бер нисә көн яҡмай тотоп, тараҡандарҙы туңдырыу.

♦ **Мәсет тараҡаны** *йәки* **сыбар тараҡан** *диал.* сеңгәсәй. **Тараҡан бото кеүек** сатай-ботай яҙылған яҙыуға ҡарата әйтелә. **Тараҡан булыу** кемдәрҙеңдер араһына инеп, мөнәсәбәтенә ҡамасаулау.

● *Балыҡҡа — арыҡ, тараҡанға — ярыҡ.* Әйтем.

**ТАРАҠЛАУ** *к. диал. кар.* **тарау** ¹.

**ТАРАЛҒЫ** ¹ *и.* Ҡайыш, айыл кеүек нәмәләрҙең башына ҡуйылған тимер әләктергес; ҡайыш тимере. *Айыл таралғыһы. Ҡайыш таралғыһы.* ■ *[Сәлих] Надршин иҫтәлек итеп биргән еҙ таралғылы ялтыр ҡайышын быуҙы.* С. Агиш.

**ТАРАЛҒЫ** ² *и. диал. кар.* **айыл** ¹.

**ТАРАЛЫУ** ¹ *к.* **1.** Бер төркөмдән айырылып йәки йыйылған урындан ян-яҡҡа китеү. *Халыҡ йыйылыштан таралды. Көтөү таралды.* ■ *Егет бер һыҙғырғайны ... бөтә кала ҡошо йыйылды, ти. Икенсе төрлөрәк итеп һыҙғырғайны, ҡоштар таралып бөттө, ти* (Әкиәттән). / Торған, йәшәгән урынды ҡалдырып төрлө яҡҡа китеү. *Йөрөй торғас, барыбыҙға ла урын табылды... Ҡаҙаҡ араһына уҡытыусы булып таралдыҡ.* Т. Йәнәби. / Ҡатнашыусылар төрлө яҡҡа китеп бөтөү, ғәмәлдә булыуҙан туҡтау. *Баҙар таралды. Йыйылыш таралды. Мәжлес таралды. Туй таралды.* / Ян-яҡҡа йәйелеп юҡҡа сығыу, әкренләп бөтөү. *Томан таралды.* ■ *Таралғайны төндөң эҙере. Быҫа-быҫа ҡалҡып күк уяныр һәм башланыр ҡояш ғүмере.* М. Кәрим. *Болоттар таралырға теләмәгәндәй тағы уҡмаша.* З. Әхмәтов.

**2.** Кеше аша халыҡҡа ишетелеү, күптәргә билдәле булыу (һүҙ, хәбәр, яңылыҡ, исем һ. б. ҡарата). *Хәбәр таралды. Батырҙың даны таралды.* ■ *Ҡуҙыйкүрпәстең .. яманаты таралып китте, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**3.** Төрлө урынға, күп кешегә күсеп, урын алыу, ғәмәлләшеү. *Мал араһында таралған ауырыу. Күп таралған ағас. Ныҡ таралған уйын.* / Бер сығанаҡтан сығып, ишәйеү. *Бер ырыуҙан таралған халыҡ.* ■ *Күрше тирәләге ауылдар шул Ишәленән таралып ултырған, ти* (Әкиәттән).

**4.** Һауаға йәйелеү, тирә-яҡты тултырыу. *Далаға моң таралды. Өйгә аш еҫе таралды.* ■ *Урман эсенә ағас ҡайрыһы еҫе, япраҡ, йәш үлән еҫе таралған.* Ф. Әсәнов.

**5.** Төрлө яҡҡа һибелеү, сәселеү. *Таралып ятҡан нәмәләр. Сәсе иңенә таралып төшкән.* ■ *[Мендәрҙең] кәпрәне юҡ, йөнө бөтә өйгә таралып китә.* Ғ. Дәүләтшин.

**6.** Ваҡ ҡына киҫәктәргә, өлөштәргә бүленеү, ваҡланыу. *Таралып торған балсыҡ. Ағастың сөрөгө таралып төштө.*

**7.** *күсм.* Бөтөнлөгө, төҙөклөгө бөтөү, юҡҡа сығыу. *Хужалыҡ бер ҡаҙаҡтан тарала башлай ул.* Б. Бикбай. *Донъяла үҙгәрмәгән, таралмаған бер генә нәмә лә юҡ.* И. Насыри.

**8.** *күсм.* Күңелдән китеү, бөтөү (төрлө уй-кисерешкә ҡарата). *Борсоулы уй таралды. Күңелдәге шик таралды.* ■ *Былбылым, һин һайра-һайра, бер таралһын ҡайғылар.* Ш. Бабич.

**9.** *күсм.* Иғтибар көсө бөтөү, тарҡауланыу (аң-зиһен, хәтергә ҡарата). *Хәтерем таралды.* ■ *Нужа күрә күрә, аҡыҡ кеүек зиһенем таралды.* Б. Ишемғол.

**10.** *күсм.* Иҙрәп быуынһыҙланыу (быуын, тәнгә ҡарата). *Тән таралып бара.* ■ *Фәррәх ағайҙың бөтә быуыны таралды. Хәле бөттө. Күҙҙәре үҙенән-үҙе йомола башланы.* Р. Ғабдрахманов. / Ҡаушау, ҡурҡыуҙан юғалып ҡалыу, ҡойолоп төшөү. *[Нәғим:] Һин, Хәлим, ҡапыл ҡыҙаһың да .. кешене һүндерәһең дә ҡуяһың. Бына мин таралдым да ҡалдым.* И. Насыри.

♦ **Ҡанға** (*йәки* **тәнгә**) **таралыу** нимәнеңдер тәьҫире бөтә тәнгә китеү. *Ҡымыҙ бөтә тәнгә таралды.* **Ҡан таралыу** *кар.* **ҡан** ¹.

**ТАРАЛЫУ** ² *к. төш. кар.* **тарау.** *Таралған сәс.*

**ТАРАЛЫШЫУ** *к. урт. кар.* **таралыу** ¹ 1. *Йыйылыштан таралышыу. Таралышып ултырыу. Ауылдарға таралышыу.*

**ТАРАМЫШ** I *и.* Мускул һәм һөйәктәрҙе тоташтырған һуҙылыусан нык һәм тығыҙ туҡыма. *Бөгәр аҫты тарамышы. Елкә тарамышы.* / Һуҙып киптерелгән шул туҡыма. *Айыу тарамышы. Бүре тарамышы.* // *Тарамыш еп.*

II *с. һөйл.* **1.** Нык тәнле, ҡаҡса кешегә әйтелә. *Тарамыш беләк.*

**2.** *кусм.* Бик һаран, һыҡмыр. *Тарамыш кеше.*

**ТАРАН** [1] *и.*, **таран балыҡ** Сазандар ғаиләһенә ҡараған яҫы, көмрө кәүҙәле, бәләкәй генә тупаҡ башлы, ҡыҙғылт йөҙгөслө йылға-күл балығы.

**ТАРА́Н** [2] [*рус.*] *и.* **1.** Дошман самолётын (танкыһын, карабын) ҡыйратыу өсөн үҙ самолетың, (танкың, карабың) менән төкөтөп атакалау алымы. *Таранға барыу. Таран яһау.* ■ *Бикеев үҙ танкыһын уңға борҙо һәм дошман танкыһына таранға ташланды.* Ш. Бикҡол.

**2.** *диңг.* Дошман карабын төкөтөү өсөн хәрби судноның алдына эшләнгән осло нәмә.

**3.** *иҫк. ҡар.* **кусҡарбаш.**

**ТАРАНЛАУ** *ҡ.* Таран яһау; төкөтөү. *Самолётты таранлау.*

**ТАРАНСАЙ** *и.* Бәләкәй таран балығы.

**ТАРАНТА́С** [*рус.*] *и. ҡар.* **ҡырандас.**

**ТАРАНЫУ** *ҡ. ҡайт. ҡар.* **тарау** [1] 1. *Таранып ултырыу.*

● *Таҙ таранғанса, туй таралған.* Мәҡәл.

**ТАРАТА́ЙКА** [*рус.*] *и. диал.* Ҡуян арбаһы (*ҡар.* **арба**).

**ТАРАТТЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **таратыу** [1] 1—5. *Халыҡты тараттырыу. Килгән китаптарҙы таратырыу. Аҡса таратырыу.*

**ТАРАТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **таратыу.**

**ТАРАТЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Бергә йыйылған, бер урында булған нәмәләрҙе башҡа-башҡа айырыу. *Һаламды таратыу. Утынды таратыу. Таратып ташлау. Таратып киптереү.* ■ *Аҙнагол Зөлхизәнең .. толомдарын һүтеп тарата.* З. Биишева. / Бергә булған нәмәләрҙе ян-яҡҡа йәйелдереү йәки төрлө ергә күсереү. *Сәлмән .. көлдө баҡсаһына таратып сыҡҡан* (Әкиәттән). *Йүгереп тә йүгереп үрттәр һалдым Үҙән буйҙарына таратып* (Халыҡ йырынан).

**2.** Бер төркөмдәге кеше йәки хайуандарҙы һәр береһен үҙ ыңғайына ҡуйып, ян-яҡҡа ебәреү. *Һыйырҙарҙы таратып ашатыу.* ■ *Айбулат йылҡы көтөүен ҡылғанлы типһәнгә таратып ебәргән.* Һ. Дәүләтшина. / Кеше йәки хайуандарҙы башҡа-башҡа айырып урынлаштырыу, билдәле бер урынға тәғәйенләү. *Уҡыусыларҙы эшкә таратыу.* ■ *Беҙҙе хосуси фатирҙарға таратылар.* Д. Юлтый.

**3.** Бер төркөмдәге кеше йәки хайуандарҙы ҡыуып, ян-яҡҡа туҙҙырыу. *Баҙарҙағы халыҡты атлы казактар таратты.* Д. Юлтый.

**4.** Бер өйкөмдәге нәмәне туҙҙырып, юҡ итеү. *Томанды таратыу.* ■ *Етеҙ ел килеп сыға ла уны [болотто] таратып ебәрә.* З. Әхмәтов.

**5.** Ниҙелер күмәк кешегә берәм-берәм биреү; өләшеү. *Аҡса таратыу. Бүләк таратыу. Кәнфит таратыу.* ■ *Ҡатындар оҙаҡ ултырманы, байбисә тараткан таҫтамалдарҙы .. алдарына һалып доға ҡылдылар ҙа, .. өйҙәренә таралыштылар.* Я. Хамматов. / Айырым нәмәләрҙе тейешле кешеһенә йәки урынына тапшырыу. *Газета таратыу. Хат таратыу. Саҡырыу ҡағыҙы таратыу.* ■ *[Сания:] Көн дә улар листовка тарата.* С. Агиш.

**6.** Кеше аша халыҡҡа ишеттереү, күп кешегә билдәле итеү, еткереү (һүҙ, хәбәр һ. б.). *Һүҙ таратыу. Ҡотҡо таратыу. Фекер таратыу.* ■ *Ел таратып йөрөй имен хәбәр донъяләғы таныш белешкә.* М. Кәрим.

**7.** Күмәк кешегә еткереп, күптәрҙе йәлеп итеп, ғәмәлгә ашырыу. *Аң-белем таратыу. Тәжрибә ҡаҙаныштарын таратыу.* ■ *Тимер .. һәр бер яңылыҡты күтәреп алып, тиҙерәк колхозға таратырға тырышты.* Б. Бикбай.

**8.** Тирә-яҡҡа йәйелдереп, ян-яҡты тултырыу. *Еҫ таратыу. Нур таратыу.* ■ *Ҡорос моңдарын таратып, сыңлай салғы сыңдары.* М. Кәрим.

**9.** *кусм.* Ниндәйҙер хәл-күренеште, сәбәбен бөтөрөп, юҡ итеү, юҡҡа сығарыу. *Күңелһеҙ уйҙарҙы таратыу. Хәсрәтте таратыу.* ■ *Бесән ваҡыты ла етте, кәкүк тотлоҡто, ҡайғыларҙы таратырға моңон онотто.* Б. Бикбай.

**ТАРАТЫУ** [2] *ҡ. йөкм. ҡар.* **тарау** [1]. *Бына нәҙек билле тал ҡуҙғалды, бөҙрә сәсен елдән таратып.* Ҡ. Даян.

**ТАРАТЫШЫУ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **таратыу** [1] 1—3, 5. *Бесәнде таратышыу. Бүләк таратышыу.*

**ТАРАУ** [1] *ҡ.* **1.** Тараҡ йәки башҡа нәмәне батырып, сәс, ял кеүектәрҙең бөртөктәрен аралап яҙыу, шымартыу. *Аттың ялын тарау. Башты тарау. Сәс тарау. Тараҡ менән тарау. Артҡа тарау. Ҡырын тарау. Уртаға ярып тарау. Тарап үреү.* ■ *Теге кеше .. урындыҡҡа ҡырын ятып, бармағы менән һаҡалын тарарға тотонды.* Д. Юлтый. *Һатыусынан тараҡ алдым сәскәйемде майлап тарарға* (Халыҡ йырынан).

**2.** Махсус тараҡ менән кәзәнең дебетен алыу. *Кәзә тарау.* / Сүсте тәрәш тараҡ менән талҡыштан аралау. *Етен тарау. Киндер тарау.*

**ТАРАУ** [2] *с.* Бер-береһенән алыҫ, аралары йыраҡ булған; тарҡау. *Тарау булыу.* // *Тарау йөрөү. Тарау ултырыу.* ■ *Тауҙың үңерҙәрендә, битләстәрендә тарау-тарау булып ауылдар ултырған.* Ж. Кейекбаев.

**ТАРАУ** [3] *и. диал.* Тарлауыҡ.

**ТАРАФ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Билдәле бер йүнәлеш; яҡ. *Көнбайыш тараф. Уң тараф. Һул тараф. Донъяның дүрт тарафы.* ■ *Тауҙың бер яғында Һаҡмар һыуы, көн тарафта Талҡаҫ күренә.* С. Кулибай. / Ҡайһылыр бер йүнәлештәге урын; яҡ. *Июнь яңы башланған.. Һәр тараф сәскә.* Ш. Янбаев. *Һөйөклөм, мин буран, ҡарҙар яуған тарафтамын.* М. Кәрим.

**2.** Берәй эш йәки мәсьәләгә бәйле хәл, шарт, мөмкинлек һ. б. *[Садрисламға] ҡапыл белдереү ярамай. Тәүҙә һәр тарафын уйларға кәрәк.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** Ниндәйҙер мөнәсәбәт нигеҙендә айырымланған һәм бер-береһенә ҡаршы булған яҡ. *Беҙ ҡушылдыҡ ҡыҙыл тарафына, ҡыҙыл беҙҙең яҡлы булғанға.* Ш. Бабич. *Ике күҙҙәй яҡын, алыҫ ир һәм ҡатын.. Һәр икәүҙә — ике донъя, ике тараф.* Р. Шәкүров.

4. Сығн. клш. аффикстары менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*ҡар.* **тарафтан, тарафынан**).

**ТАРАФДАР** [*ғәр.* ⟨ *фарс.*] *и. кит.* Бер төрлө эш-мәсьәлә йәки тормоштағы йүнәлеш буйынса кем менәндер бер тарафта, бер ҡараштa торған кеше. *Был кеше заманына күрә аңлы булып, яңылыҡ тарафдары, ишанлыҡ һәм суфыйлыҡҡа ҡаршы ине.* М. Ғафури.

**ТАРАФТАН** *бәйл. функцияһында* Эйәлек килешендәге 1, 2-се зат алмаштарынан һуң килеп, эш-хәрәкәттең башҡарыусыһын белдерә. *Беҙҙең тарафтан эшләнгән эш. Һеҙҙең тарафтан яҙылған хат.* ■ *Минең тарафтан уға бер төрлө адрес биреү мөмкин түгел ине. Сөнки беҙ бөгөн бында, иртәгә тегендә.* Д. Юлтый.

**ТАРАФЫНАН** *бәйл. функцияһында* Төп килештәге һүҙҙәрҙән һуң килеп, эш-хәрәкәттең башҡарыусыһын белдерә. *Уҡытыусылар тарафынан ҡутәрелгән мәсьәлә.* ■ *Әкиәт дөйөм халыҡ тарафынан үҙгәртелеп, шымартылып, эшләнә бара.* Ғ. Амантай.

**ТАРАШ**[1] *и.* Ағып сығып, һағыҙ һымаҡ ҡарайып ҡатҡан ҡайын һуты (элек сәй итеп эскәндәр).

**ТАРАШ**[2] *и. диал. ҡар.* **тарма.**

**ТАРАШЫУ** *ҡ. урт.* **1.** *ҡар.* **тарау**[1] 1. *Сәс тарашыу.*

**2.** *ярҙамл. ҡар.* **тарау**[1] 2. *Кәзә мамығын тарашыу.*

**ТАРБАҒАЙ**[1] *и.* Ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған, тарбаҡ ботаҡлы, һары сатыр сәскәле бейек үлән (мал яратып ашай).

**ТАРБАҒАЙ**[2] *и. диал.* Әрмәнде.

**ТАРБАҒАЙ**[3] *с. ҡар.* **тарбаҡай.**

**ТАРБАҒАЙЫУ** *ҡ. ҡар.* **тарбаҡланыу.**

**ТАРБАҒАН** *и.* Байкал арты, Алтай, Монголия һәм Төньяҡ Ҡытайҙа йәшәгән һыуыр төрө. *Һикерә-һикерә тарбаған үтеп китте. Уның, үргүян кеүек, алғы аяҡтары тоҡор, артҡылары оҙон икән. Артҡы аяҡтарын терәй биреп, бик ныҡ һикереп китә.* Ғ. Аллаяров.

**ТАРБАЙ-ТОРБАЙ** *с. һөйл. ҡар.* **тарбаҡ-торбаҡ.**

**ТАРБАЙТЫУ** *ҡ.* Киреп ян-яҡҡа айырыу. *Бармаҡтарҙы тарбайтыу.* ■ *Ҡола бейә ике аяғын тарбайтып баҫҡан да, рәхәтләнеп ҡолонон имеҙеп тора.* Ш. Шәһәр.

**ТАРБАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Остары ян-яҡҡа ҡарап кирелеп, тырпайып тороу (ҡулға, ағас ботаҡтарына ҡарата). *[Әхмәҙиҙең] бармаҡтары .. тарбайып тора.* Ж. Кейекбаев. *Ҡая һөҙәкләнә төшә һәм ул урындарҙа ҡарт ҡарағайҙар тарбайып ултыра.* Ә. Вахитов.

**2.** Аяҡты ныҡ киреү. *Тарбайып баҫыу. Тарбайып тороу.*

**ТАРБАҠ**[1] *с.* Ян-яҡҡа ҡарап тырпайышып торған, остары ныҡ айырылған. *Тарбаҡ ботаҡлы ағас. Тарбаҡ булыу.*

**ТАРБАҠ**[2] *и. һөйл. ҡар.* **тармаҡ** 2. *Тамырынан тумырҙыңмы, талың короп ҡалыр ул, тарбағынан ҡан-йәш һарҡып тып-тып итеп тамыр ул.* Р. Ғарипов.

**ТАРБАҠАЙ** *с. һөйл.* Тырпайышып торған, остары ныҡ айырылған; тарбаҡ. *Тарбаҡай ағас. Тарбаҡай ботаҡ. Тарбаҡай йәпле һәнәк.*

**ТАРБАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Тарбаҡ[1] булыу, тарбаҡҡа әйләнеү. *Тарбаҡланып үҫкән ағас. Тарбаҡланып торған мөгөҙ.*

**ТАРБАҠЛЫ** *с.* Тарбаҡланып торған. *Тарбаҡлы ағас. Тарбаҡлы мөгөҙ. Тарбаҡлы тамыр.*

**ТАРБАҠ-ТАРБАҠ** *с. һөйл.* Тармаҡ-тармаҡ.

**ТАРБАҠ-ТОРБАҠ** *с. һөйл.* Ныҡ тарбаҡлы булған. *Тарбаҡ-торбаҡ ағас.*

**ТАРБАНЛАТЫУ** *ҡ.* Аяҡ-ҡулды тарбан-торбан иттереү. *Мәғәфүр аяҡтарын тарбанлатып ергә терәргә маташҡансы, Хөсәйен әйләндереп ташлап өлгөрҙө.* Ж. Кейекбаев.

**ТАРБАНЛАУ** *ҡ.* Аяҡ-ҡул менән сатай-ботай хәрәкәттәр яһау, тарбан-торбан килеү. *Тарбанлап бейеү. Тарбанлап йүгереү.* ■ *Ҡустым бәләкәс кенә, тарбанлап яңы йөрөй.* А. Игебаев.

**ТАРБАН-ТОРБАН** *оҡш.* Аяҡ-ҡулдар менән тәртипһеҙ, сатай-ботай хәрәкәттәр яһағанды белдерә. *Тарбан-торбан итеү. Тарбан-торбан килеү. Тарбан-торбан барып төшөү.*

**ТАРҒАҠ** *и. диал.* Тәгәрлек.

**ТАРҒЫЛ** *с.* Юлаҡ-юлаҡ һыҙаттары булған. *Тарғыл йылан. Тарғыл йыуа.* ■ *Мейәс буйы тарғыл таш* (Халыҡ йырынан).

**ТАРҒЫЛЫНЫУ** *ҡ. диал.* Тын тарлығыу (*ҡар.* **тарлығыу**).

**ТАРЖАЙТЫУ** *ҡ.* Киң итеп киреү, өңрәйтеү (танау тишеген). *Танауҙы таржайтыу.*

**ТАРЖАЙЫУ** *ҡ.* Киң булыу, өңрәйеп тороу (танау тишегенә ҡарата). *[Йондоҙ ҡашҡаның] танауҙары таржайып, күҙҙәрендә осҡон уйнап китте.* Р. Солтангәрәев.

**ТАРЖЫҠ** *с.* Киң булған, өңрәйеп торған тишекле (танауға ҡарата). *[Миһрандың] төҫө-киәфәтә насар: бите быжыр, танауы таржыҡ.* Ш. Шәһәр.

**ТАРИҠ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Тотҡан юл, йүнәлеш. *Был тариҡта бик күп булды яман һүҙҙәр, илай-илай һуҡыр булды бик күп күҙҙәр* (Бәйеттән).

**2.** Ысул, алым. *[Пётр батша] был фетнәне солоҡ тариҡы илә баҫырға ҡушып, Хованскийҙы Ҡаҙанға күндерҙе.* М. Һаҙыев.

**ТАРИФ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Түләм-һалымдың рәсми рәүештә билдәләнгән күләме. *Тарифта ҡаралған хаҡ.* / Түләм-һалым, эш хаҡы һ. б. күләме күрһәтелгән таблица, йыйынтыҡ. *Тариф буйынса түләү.*

**ТАРИФИКА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Эштең йәки һалым һалынасаҡ объекттың төрөн билдәләү нигеҙендә тариф үткәреү эше.

**ТАРИХ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Үҫеш, үҙгәреш хәлендәге ысынбарлыҡ. *Тарих закондары. Тарих диалектикаһы.*

**2.** Үткән тормоштағы ижтимағи төрлө хәл-ваҡиға һәм шул хәл-ваҡиға тураһындағы хәтирә. *Тарихты өйрәнеү. Тарихҡа инеү. Тарихта ҡалыу.*

**3.** Кешелек йәмғиәтенең үҫешен, үткән тормоштағы төрлө ижтимағи хәл-ваҡиғаны өйрәнгән фән. *СССР тарихы. Башҡортостан тарихы.* ■ *Яҙма тарих тәү башлап ... Египет, Вавилония дәүләттәрендә барлыҡҡа килә.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 17 ғинуар.

**4.** Ниҙеңдер эҙмә-эҙлекле үҫеше, үҫеш барышы. *Ерҙең геологик тарихы. Башҡорт әҙәбиәтенең тарихы.*

**5.** Ниҙеңдер эҙмә-эҙлекле үҫешен, үҫеш барышын өйрәнгән фән. *Театр тарихы. Әҙәбиәт тарихы.*

**6.** Кем йәки нимәгәлер бәйле булған төрлө хәл-ваҡиға. *«Шәүрә» йырының тарихы.* ■ *Ул [Йәгәфәр] һәр балығының әләгеү тарихын һөйләй.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТАРИХИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Тарихҡа (1—4 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Тарихи осор. Тарихи үҫеш. Тарихи ҡомартҡы.* ■ *Быуаттар буйы [килгән] тарихи ҡыҫымдарҙы үҙ елкәһенән үткәреү сәбәпле [халыҡ] бөкһөп ярлыланған.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Ысынбарлыҡта булған, ысын булған. *Тарихи ваҡиға. Тарихи шәхес.*

**3.** Үткән тормошта, тарихта булған хәл-ваҡиғаны сағылдырған. *Тарихи әҫәр. Тарихи роман. Тарихи фильм.*

**4.** Тарих өсөн әһәмиәтле, тарихҡа инерлек. *Тарихи көн. Тарихи ҡарар.* ■ *Питер эшселәре .. тарихи көрәш алып бара.* Д. Юлтый.

**5.** Төрлө күренеш, хәл-ваҡиғаның барлыҡҡа килеүен, үҫешен шул заман шарттарына бәйле рәүештә тикшергән. *Тарихи ысул. Тарихи ҡараш.*

**6.** Төрлө күренеште эҙмә-эҙлекле үҫеш процесынан сығып тикшереүгә нигеҙләнгән. *Тарихи грамматика.*

**ТАРИХСЫ** *и.* Тарих өйрәнеүсе, тарих фәненең белгесе.

**ТАРҠАЛДЫРЫУ** *ҡ. ҡар.* **тарҡатыу** 1, 2. *Матдәне тарҡалдырыу. Халыҡты тарҡалдырыу.*

**ТАРҠАЛЫУ** *ҡ.* **1.** Өлөштәргә, киҫәктәргә бүленеп ваҡланыу. *[Бураның] бүрәнәләре серек, төртһәң, тарҡалырға ғына тора.* Й. Солтанов.

**2.** *махс.* Өлөштәргә, элементтарға бүленеү. *Молекула атомдарға тарҡала.* ■ *Ер өҫтөнә сығып ятҡанда нефть тарҡала.* Д. Бураҡаев.

**3.** *күсм.* Үҙ-ара бәйләнеш, берҙәмлек бөтөүҙән таралыу (төрлө ойошма, берләшмә һ. б. ҡарата). *Ғаилә тарҡалды. Ойошма тарҡалды. Хужалыҡ тарҡалды.* ■ *Хандың гәскәре .. бик күбеһе ҡырылып, иҫән ҡалғаны тар-мар булып юғалып, мәсхәрәгә ҡалып, тарҡалып бөттө, ти* (Әкиәттән). / Булыу тәртибе боҙолоп юҡҡа сығыу, өҙөлөү. *Туй тарҡалды. Уйын тарҡалды. Эш тарҡалды.*

**4.** *һөйл.* Төркөмдән айырылып ян-яҡҡа китеү; таралыу. *Берәм-берәм сәселеп, тарҡалып йүгерешкән йәйәүлеләр күренә башланы.* Һ. Дәүләтшина.

**5.** *күсм.* Ян-яҡҡа йәйелеп юҡҡа сығыу; таралыу. *Томан тарҡалды. Болот тарҡалды.*

**6.** *күсм. ҡар.* **таралыу**[1] 7—9. *Зиһенем тарҡалды. Быуындар тарҡалды.* ■ *Күсәктең асыуы инде тарҡала, ти.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

● *Кәңәшле ил тарҡалмаҫ.* Мәҡәл.

**ТАРҠАЛЫШ** *и.* **1.** *махс.* Матдәнең өлөштәргә, элементтарға бүленеше. *Атомдың тарҡалышы. Аҡһымдың тарҡалышы.*

**2.** Аралағы ҡаршылыҡ, килешмәүсәнлек арҡаһында барлыҡҡа килгән бүленеш. *[Хайуандар] барыһы төрлөсә һөйләп, төрлөһө төрлөсә уйлап, һис берлеккә килмәйенсә .. тарҡалышта ҡалған, ти.* «Урал батыр».

**ТАРҠАЛЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **тарҡалыу** 1.

**ТАРҠАТЫУ** *ҡ.* **1.** Яңы ижтимағи төркөмдәргә бүлеү. *Крәҫтиән ҡатламын тарҡатыу. Яңы сословиеларға тарҡатыу.*

**2.** Берәй ойошма, берләшмә, төркөм һ. б. тарҡау[4] (1 мәғ.) хәлгә килтереү. *Коллективты тарҡатыу. Бригаданы тарҡатыу. Хужалыҡты тарҡатыу. Эште тарҡатыу.*

**3.** *ҡар.* **таратыу**[1] 8. *«Урал» көйөнөң .. моңо Айбулаттың ауыр уйҙарын, ялҡынлы хәсрәттәрен тарҡатты.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** *махс.* Өлөштәргә, элементтарға бүлеү. *Һыуҙы кислород һәм водородҡа тарҡатыу.*

**ТАРҠАТЫУСЫ** *и.* Ойошмала, төркөмдә ҡаршылыҡ сығарып, берҙәмлекте боҙоусы.

**ТАРҠАУ**[1] *ҡ.* Ян-яҡҡа китеү, таралыу. *Еллеямғырлы ҡара төндәрҙә мал тарҡап китеп, төрлө һәләкәткә осрамаһын өсөн айғыр өйөрҙө ... ышығыраҡ ергә алып китә.* М. Ғөбәйҙуллин.

**ТАРҠАУ**[2] *ҡ. иҫк. ҡар.* **таратыу**[1] 1.— *Алтын сәсем тарҡаһам, нурға илде күмәмен.* «Урал батыр».

**ТАРҠАУ**[3] *и. ҡар.* **тарҡаулыҡ**. *[Батшаның] тағы килде фарманы. Бына ошо фармандар тарҡау һалды араға.* «Ҡараһаҡал».

**ТАРҠАУ**[4] *с.* **1.** Бер урынға тупланмаған, аралары алыҫ булған. *Тарҡау бригадалар урынына .. комплекслы бригадалар ойошторолдо.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 26 май. / *күсм.* Бер йүнәлеш, уртаҡ фекер менән берләшмәгән; берҙәмлек булмаған. *Тарҡау коллектив.* // *Беҙ ҡуян халҡы, был көнгә саҡлы тарҡау йәшәнек.* Б. Мирзанов.

**2.** *күсм.* Тәртип менән алып барылмаған; тәртипһеҙ. *Тарҡау эш.* // *Ремонт бик тарҡау бара.*

**3.** *күсм.* Билдәле бер йүнәлеш алмаған, тупланмаған (уй-фекергә ҡарата). *Уйҙарым тарҡау, томан, ҡайнай йәһәннәм, ауырый баш.* Ш. Бабич. / Уй-фекерен, иғтибарын туплай алмаған (кешегә ҡарата). *Кеше тарҡау булһа һәр ваҡыт ашыға.* М. Ғатауллин.

● *Ялҡауҙың эше тарҡау.* Әйтем.

**ТАРҠАУЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Тарҡау[4] хәлгә килтереү, тарҡау итеү. *Фекерҙе тарҡауландырыу.*

**ТАРҠАУЛАНЫУ** *ҡ.* Тарҡау[4] булыу, тарҡауға әйләнеү. *Халыҡ тарҡаулана. Хәтер тарҡаулана. Эш тарҡаулана.*

**ТАРҠАУЛЫҠ** *и.* **1.** Бер бөтөндө тәшкил иткән өлөштәрҙең үҙ-ара бәйләнешһеҙ булыуы, йыйнаҡһыҙлыҡ. *Сюжет тарҡаулығы. Композициялағы тарҡаулыҡ.* ■ *Яһалмалыҡтар кинәйәнең тарҡаулығына, оҙонлоғона килтергәндәр.* Н. Зарипов.

**2.** *күсм.* Үҙ-ара бәйләнеш, берҙәмлек булмаған хәл. *Был хәл һалдаттарға тарҡаулыҡ индерҙе, улар асыҡ магазиндарға, лавкаларға йүгерҙеләр.* Д. Юлтый.

● *Берлектә — бәрәкәт, тарҡаулыҡта — һәләкәт.* Мәҡәл.

**ТАРҠ-ТАРҠ** *оҡш. һөйл.* Ғыжылдап сыҡҡан өҙөк-өҙөк ҡаты тауышты белдергән һүҙ. *Тарҡ-тарҡ итеү. Тарҡ-тарҡ килеп тартай ҡысҡыра.*

**ТАРКЫЛДАУ** *к. һөйл.* Тарк-тарк итеү, тарк--тарк килеү. *Тартай таркылдай.*

**ТАРКЫЛЫУ** *к. иҫк.* **1.** Ташыу, ташып барыу (хискә карата). *Башкортомдоң тауышын ишеттиһәм, таркыла ла йөрәгем һагышы* (Халык йырынан).

**2.** Тамшаныу.

● *Һыйырлы һыйга таркылмаҫ.* Мәкәл.

**ТАРКЫУ** *к. иҫк.* Күңелдә йөрөтөү (хисте]. *Кешегә асыу таркыган, кәһәрҙә таштай катыган, .. һинең ыулы йөрәгең таш иреһә лә иремәҫ.* «Урал батыр».

**ТАРЛАН: тарлан буҙ** *йәки* **күк тарлан** сак кына башка төҫ катыш буҙ (атка карата). *Күк тарлан ат.* ■ *[Тәвкилев] калын яллы, оҙон кикелле тарлан буҙ ат[ын] .. уйнаклатып барҙы.* Ғ. Ибраһимов.

**ТАРЛАНЫУ** *к. диал. кар.* **тарһыныу** 1.

**ТАРЛАУ** *и.* **1.** *һөйл.* Ашлык сәселгән ер; баҫыу. *Арыш, бойҙай, һоло тарлауҙары алыҫтарҙан күренә.* С. Кудаш. / *диал.* Баҫыу кәртәһе.

**2.** *диал.* Аклан.

**ТАРЛАУЫК** *и.* Тау һәм кая таштарҙы киҫеп үткән тар тәрән аралык. *Тарлауык аша. һалынган күпер.* ■ *Кариҙел каялы тарлауык яһап, котороп ага.* М. Хисмәтов. *Юл түбәләре күккә ашкан .. тауҙар, төбө күренмәгән тәрән тарлауыктар буйлап һуҙыла.* Ә. Чаныш.

**ТАРЛЫҒЫУ: тын тарлығыу** 1) тын алыуы ауырлашыу; тын кыҫылыу. *Тыны тарлыгып, Гөлйөҙөм урам як тәҙрәне асып ебәрҙе.* Ф. Исәнғолов; 2) *күсм.* кем йәки нимәнелер яратмай тарһыныу. *Сит кешене яратмай тарлыгыу.*

**ТАРЛЫК** *и.* **1.** Тар (1, 2 мәғ.) булыу сифаты, тар булған хәл. *Урам тарлыгы. Урындың тарлыгы. Итәктең тарлыгы.* ■ *Беҙ киләбеҙ .., мин шатланам һөйгәнем барлыгына.., һукмактың тарлыгына.* Н. Нәжми. *[Томан эсендә] киңлек тә юк, тарлык та юк, юк тура юл.* Р. Бикбаев.

**2.** Кешенең үҙ ирке сикле булған хәл, ирекһеҙлек. *Тарлык кисереү.* ■ *Юк тыныслык, тулганам да тулганам. Күрмәһәм дә тарлык, хурлык, кәмселек, куркыныс уйҙар эсендә уйланам.* Ш. Бабич.

**3.** *күсм.* Тормоштағы матди етешһеҙлек, нимәгәлер мохтажлык; кыҫынкылык. *Тарлыкта көн итеү.* ■ *[Бай балалары] аксалары бөтөп, тарлыкка калыу ихтималын иҫтәренә лә төшөрмәй.* М. Ғафури.

**4.** *күсм.* Кеше уңышынан көнләшеү, тарығыу хисе. *Беҙ тарлык, ваклык аркаһында киләсәктән мәхрүм калабыҙ.* Ғ. Хәйри. *Бар бит әле әскерлелек, көнләшеүҙәр, тарлык, гәйбәттәр.* Ғ. Рамазанов.

**5.** *күсм.* Кем йәки нимәнеңдер насар шаукымы; зыян, камасау. *Кемгәләр тарлык яһау. Кешегә тарлык тейеү.* ■ *[Сейәбикә Әлекәйгә:] Минең йөрөүҙең һиңә ни тарлыгы бар, һәптән. Сураголдоң башын ашаның, инде миңә калдымы?* Т. Хәйбуллин.

● *Түрәгә каршы килһәң — көнөңә тарлык, муллага каршы килһәң — динеңә тарлык.* Мәкәл. *«Һинеке», «минеке» — күңел тарлыгы.* Мәкәл.

**ТАРЛЫКТЫРЫУ: тынды тарлыктырыу** тын алыуҙы ауырлаштырыу, тынды кыҫыу. *[Карлугас:] Был аҫыл кейемдәр .. мине кыҫалар, тынымды тарлыктыралар.* Б. Бикбай.

**ТАРМА** *и.* **1.** Һабағынан сүс, орлоғонан май алына торған тарбакай ботаклы бейек үлән; киндер. *Кырагай тарма. Тарма баҫыуы. Тарма орлого. Тарма майы.*

**2.** Шул үсемлектән алынған сүс. *Талкышлы тарма. Тәрәшләнгән тарма. Тарма иләү. // Тарма еп.*

♦ **Сыскан тармаһы** *диал.* бәпкә үләне (*кар.* үлән).

**ТАРМАК** *и.* **1.** Нимәнеңдер үҙәктән айырылып, ян-якка киткән өлөшө (буй яткан, һуҙылған нәмәләргә карата). *Юл тармагы. Тау тармагы.* ■ *Тимер юл бер нисә тармакка айырылып китә.* А. Таһиров.

**2.** Үсемлектә төп тамырҙан айырылып сыккан ян үсенте. *Тамыр тармагы. Тармактан үрсеү.*

**3.** *диал. кар.* **ботак** 1. *Гөл тармагы.*

**4.** Билдәле бер фән, хужалык, техника йәки эштәге айырым өлкә. *Промышленностың яңы тармактары. Медицина фәне тармактары.* ■ *Башкортостан ауыл хужалыгының төп тармактары — игенселек һәм малсылык.* М. Хисмәтов.

**5.** *күсм. диал. кар.* **тамыр** 5.

**ТАРМАКЛАНЫУ** *к.* **1.** Үҙәктән буй-буй булып ян-якка айырылыу. *Тармакланып торган тау. Тармакланып киткән юл.*

**2.** Ян 'үсенте сығарыу (тамырға карата). *Керәндең тамыры нык тармакланып үҫә.*

**3.** *диал.* Ботак сығарыу, ботакланыу.

**4.** *күсм.* Бер дөйөм берәмектән төрлө өлкәгә айырылыу, күп тармаклыға әйләнеү. *Әҙәбиәт фәне лә, әҙәби тәнкит тә художестволы әҙәбиәттән үҫеп сыгып тармакланып киткән категория.* «Совет Башкортостаны», 1966, 20 ғинуар.

**ТАРМАКЛЫ** *с.* **1.** Тармактары (1, 2 мәғ.) булған, тармактарға айырылған. *Тармаклы юл. Күп тармаклы тамыр.*

**2.** Төрлө өлкәгә бүленгән, тармакланған. *Күп тармаклы хужалык.* ■ *Колхоз — күп тармаклы.. Уның һөтсөлөк, йылкысылык, һарыксылык, кошсолок фермалары бар.* Р. Ниғмәти.

**ТАРМАК-ТАРМАК** *с.* Ян-якка киткән тармактар (1, 2 мәғ.) рәүешендәге; тармактары күп булған. *Тармак-тармак мөгөҙ. // Тармак-тармак йәйелгән тамыр.* ■ *Урал тауы караһаң, тармак-тармак таралган.* «Юлай менән Салауат».

**ТАРМАЛЫК** *и. һөйл.* Тарма күп үҫкән урын.

**ТАРМАНА** *и. диал.* Дармана.

**ТАР-МАР** [*фарс.*]: **тар-мар итеү** (*йәки* **килтереү**) кыйратыу, емереү, юк итеү. *Дошман сафын тар-мар итергә изге яуга уктай укталдым.* Салауат Юлаев. **Тар-мар булыу** (*йәки* **килеү**) кыйралыу, емерелеү, юкка сығыу. *Тар-мар килһен беҙҙең кыҫымдан актык көсөн йыйган капитал.* Х. Кунакбай.

**ТАРМЫТ** *и. диал.* **1.** *кар.* **тын** [5]. *Өс тармыттан үреү.*

**2.** *кар.* **ара** [2].

● *Тамыр тармытҡа тарта, тармыт илгә тарта.* Мәҡәл.

**ТАРПАҒАЙ** *и. диал. кар.* **тартай** 1.

**ТАРПАН** *и.* **1.** (йәки **буҙ тарпан**) Көнсығыш Европаның көньяҡ далаларында йәшәгән, 19 быуаттың урталарына тотош ҡырып бөтөрөлгән, сыҫҡан һыртлы, көлһыу буҙ төҫлө ҡырағай ат.

**2.** *күсм.* Кем йәки ниҙеңдер ҡырағай заты. *Мал тарпаны.*

**3.** *с. мәғ.* Эйәләштерелмәгән, ҡырағай. *Тарпан мал.* ■ *Байҙың улын [йылҡылар] яҡын ебәрмәгәндәр, тарпан булып киткәндәр, ти.* «Аҡһаҡ ҡола».

● *Тарпан атҡа — бер арҡан.* Әйтем.

**ТАРПЫ** *и. иҫк.* Үҙ-ара туғанлыҡтары булған төркөм. *[Күсекбай:] Бөтә Дәүләтбирҙе тарпыһы минең яҡта булыр, Арыҫлан ағай.* Ғ. Ибраһимов.

**ТАРСЫЛЛЫҠ** *и. диал.* Юҡсыллыҡ.

**ТАРҪ** *окш. һөйл.* Көслө, һаңғырау тауышты белдергән һүҙ. *Тарҫ итеү. Тарҫ итеп ҡалыу.*

**ТАРҪ-ТОРҪ, тарҫ та торҫ** *окш. һөйл.* Ҡабат-ҡабат тарҫ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Тарҫ-торҫ итеү. Ҡурҡыштан йөрәк тарҫ-торҫ һуға.*

**ТАРҪЫЛДАУ** *к. кар.* **тарһылдау.**

**ТАРТАЙ** *и.* **1.** Башы, арҡаһы һарғылт тут төҫөндәге, оҙон аяҡлы, ҡыҫҡа ҡойроҡло күгәрсен ҙурлыҡ ҡош. *Күҙ бәйләнә. Төшә киске эңер, ҡыҫҡырыша ярһып тартайҙар.* Р. Ғарипов.

**2.** *күсм.* Ябыҡ, ҡаҡса кешегә ҡарата әйтелә.

● *Тартай теленән таба.* Мәҡәл.

**ТАРТАНЛАУ** *к. диал.* Тыртанлау.

**ТАРТАР** *и. диал. кар.* **тартай** 1.

**ТАРТАУЫЛЛАУ** *к. һөйл.* Ниндәйҙер бер йүнәлешкә тартыу, ыңғайлай биреү. *Урманға тартауыллап барыу.*

**ТАРТҠЫ** [1] *и.* **1.** (*йәки* **урын тартҡыһы**) Урын ҡаралдыһын тәңкләп өйгәс, өҫтән тартып ҡуя торған матур яҫы бау. / Эйәр өҫтөнә һалған нәмәне тарттырып бәйләгән яҫы бау. / Сәңгелдәктәге баланы арҡыры тартып бәйләгән яҫы бау.

**2.** Эйәрҙе аттың түш аҫтынан тарттырған яҫы ҡайыш.

**3.** *диал. кар.* **айыл** [1] 1.

**4.** *диал. кар.* **бауырлыҡ** 1.

**ТАРТҠЫ** [2] *и.* Тартып асмалы мөрйә япҡысы; йүшкә.

**ТАРТҠЫ** [3] *и. диал.* Һыҙырғыс.

**ТАРТҠЫЛАУ** *к.* **1.** Ҡабат-ҡабат тартыу (1, 2, 9 мәғ.) *Тартҡылап ҡарау. Танауҙы тартҡылау. Ҡулдан тартҡылау.* ■ *Рәзилә үҙе меңгән ерән аттың теҙгенен тартҡыланы.* Н. Мусин.

**2.** Һирәк-һаяҡ уйнау, тартыу (музыка ҡоралдарына ҡарата). *[Сәйфетдинов:] Мин баянда уйнай белмәйем, шул хромканы ғына тартҡылайым.* Р. Солтангәрәев.

♦ **Ҡылын тартҡылау** берәйһенең уй-ниәтен белергә тырышыу. *Ғаризаға ҡул ҡуйыусыларҙың ҡылдарын тартҡылап ҡарайыҡ, уҙҙәре теләп ҡул ҡуйғандармы?* Б. Бикбай.

**ТАРТҠЫЛАШ** *и. кар.* **тартыш** [1] 1.

**ТАРТҠЫЛАШЫУ** *к.* **1.** Кем йәки нимәгәләр буйһонмай ҡарышыу, ҡаршылашыу. *Эшселәр тартҡылаша башлағас, ҡазаҡтар уларҙың бит һәм баштарына нағайкалар менән һуҡтылар.* М. Ғафури.

**2.** Үҙ-ара алышыу; бәхәсләшеү. *Ҡыҙ өсөн тартҡылашыу.*

**ТАРТҠЫС: тире тартҡыс** *кар.* **ирәк.**

**ТАРТҠЫСЛАУ** *к.* Ҡабат-ҡабат тартыу. *Гөлйөҙөм уны [Айбулатты] тартҡыслай-тартҡыслай көскә уятты.* Һ. Дәүләтшина.

**ТАРТМА** [1] *и.* **1.** Өҫтәл, шкаф кеүек нәмәнең тартып сығармалы эске ҡумтаһы. *Шкаф тартмаһы. Өҫтәл тартмаһы.*

**2.** *диал. кар.* **ҡумта** 1.

♦ **Ҡырҡ тартма** *кар.* **ҡырҡтартма.**

**ТАРТМА** [2] *и. кар.* **тартҡы** [1] 1.

**ТАРТМА** [3] *с. кар.* **тартмалы.**

**ТАРТМАЙЫЛ** *и. һөйл.* Нимәнеләр тартҡанда, һөйрәгәндә ҡулланылған, бер яҡ яурын аша кейелә торған арҡан бау.

**ТАРТМАҠ** *и. һөйл.* Ҡул быҫҡыһының керешен бора торған таяҡ.

**ТАРТМАЛЫ** *с.* Тартып, шыуҙырып асылмалы. *Тартмалы ҡапҡас. Тартмалы тәҙрә.*

**ТАРТ-ТАРТ** *окш.* Тартай тауышын белдергән һүҙ. *Тарт-тарт итеү. Тарт-тарт ҡыҫҡырыу.*

**ТАРТТЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **тарттырыу** 2—5. *Яуапҡа тарттырылыу. Эре тарттырылған он. Өй трактор менән тарттырылды.*

**ТАРТТЫРЫУ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **тартыу** 1, 2, 9—14. *Катер менән тарттырыу. Магнит менән тарттырыу. Һөрмә тарттырыу.*

**2.** Электр һуҙыу, киренке хәлгә килтереү. *Кирге менән тарттырыу. Саталы ағасҡа кейҙереп тарттырыу.* / Электр тартыу, тартып ныҒытыу. *Тарттырып бәйләү.* ■ *[Батыр] айыу тарамышынан кереш яһап тарттырған* (Әкиәттән).

**3.** Ни менәндер шылдырып килтереү; һөйрәтеү. *Ағас тарттырыу. Күбә тарттырыу.* ■ *[Зәки бер ат менән] бүрәнә тарттырырға китте.* С. Агиш. / Билдәле бер урынға төрлө ерҙән күсереү, йыйыу. *Бесәнде күбәгә тарттырыу.* ■ *Һаламды ферма эргәһенә тарттырҙыҡ.* Р. Солтангәрәев.

**4.** *күсм. һөйл.* Берәй эш өсөн суд, хөкөм алдына килтереү; тартыу. *Хөкөмгә тарттырыу. Яуапҡа тарттырыу.* ■ *[Сәмиғә:] Ни эшләнегеҙ, балаҡайҙар, әллә ҡайҙарға тарттырырҙар бит.* Х. Ибраһимов.

**5.** Тирмәндә ашлыҡты, игенде ваҡлатыу, он итеү. *Ашлыҡ тарттырыу. Он тарттырыу.* **Тирмән тарттырыу** *һөйл.* тирмәндә ашлыҡ тарттырыу.

● *Хан ҡашында гәйебең булһа, ҡара ерҙән ҡайыҡ тарттырыр.* Мәҡәл.

**ТАРТЫЛДАУ** *к.* Тарт-тарт итеү, тарт-тарт тип ҡыҫҡырыу (тартайға ҡарата). *Йылға аръяғындағы әрәмәлә тартайҙар тартылдай.* Т. Йәнәби.

**ТАРТЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **тартылдау.**

**ТАРТЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **тартыу** 4, 9—13, 16. *Хөкөмгә тартылыу. Нык тартылған бау.*

*Буйҙан-буйға тартылған шаршау. Яҡшы тартылған он. Тартылған тәмәке төпсөгө.*

**2.** Үҙлегенән ҡыҫылып ҡыҫҡарыу. *Мускулдар тартылыуға һәләтле.*

**3.** Тарткан ыңғайға килмәй, кирегә тартыу. *Ҡарышып тартылыу. Ситкә тартылыу.* ■ *Ике бандит .. Айбулатты һөйрәкләп алып бара. Айбулат тартыла, ике яғына ҡарап ниҙер һөйләй.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Кем йәки нимәгәлер ынтылыу. *Яҡты тормошҡа тартылыу. Яҡтыға тартылыу.* ■ *Көнгә баҡҡан көнбағыштай һиңә тартыла күңел.* Ҡ. Даян. / Ҡушылыу. *[Ҡатайҙар менән табындарға] һуңынан башкалар ҙа тартылған.. Туғанлыҡ нығый барған.* Ә. Вахитов.

**5.** *физ.* Бер-береһенә ынтылыу (йыһандағы есем, ике төрлө заряд һәм магнит полюстарына ҡарата). *Тартылыу көсө.*

**6.** Урындан бер аҙ шылыу; күсеү. *Үргә тартылыу.* ■ *Әхмәт сәй эскәс, артҡараҡ тартылып ултырҙы.* И. Көҫәпҡол. / Билдәле бер яҡҡа ыңғайлау, йүнәлеш алыу. *[Ҡарт] һукмаҡ буйлап ағас араһына тартылды.* Й. Солтанов.

**7.** Билдәле бер йүнәлештә ятыу, һуҙылыу. *Иҙел буйлап колхоз ауылдары тартылған.* Ғ. Сәләм.

**8.** Күпмелер ваҡытҡа һуҙылыу. *Оҙаҡҡа тартылыу.* ■ *Быҫҡаҡ ямғырҙар аҙнанан артыҡҡа тартылды.* Н. Мусин.

**9.** Булған кимәлдән төшөү, күләме кәмәү. *Йылға тартылды. Һыйырҙың һөтө тартылды.* ■ *Ҡар иреп бөттө, инде һыу ҙа тартыла башланы.* «Ағиҙел», 1971, № 3. / Төҫ-баш һурылып, тәнгә йоҡарыу. *Аттар ябыҡты, тартылды.* ■ *Моратовтың электән дә ҡаҡса йөҙө .. тартылған һәм һарғылт төҫ алған.* Ә. Вәли.

**10.** Нимә менәндер ҡапланыу. *Биҙрәләге һыу .. боҙ шекәреһе менән тартылып та өлгөргәйне.* Ш. Янбаев.

♦ **Аяҡ аҫты тартылыу** ер, юл кибә башлау.

**ТАРТЫЛЫШ** *и. физ.* Есемдәрҙең бер-береһенә тартылыу (4 мәғ.) үҙсәнлеге. *Бөтә ғаләм тартылышы.*

**ТАРТЫМ**[1] *и.* **1.** Тартыу хәрәкәте, тартыуға һалынған көс. *Тартымға килеү.*

**2.** Һөйрәп, тартып алып китерлек күләм. *Китаптары уның күп була. Барыһын бергә йыйып алып китһәң, ат тартымы тулы йөк була* Т. Йәнәби.

**ТАРТЫМ**[2] *с.* Ниндәйҙер бер сифаты, ҡайһылыр яғы менән кем йәки нимәгәлер оҡшаған, яҡын торған. *Балаға тартым кеше. Мәтегә тартым балсыҡ. Күккә тартым төҫ.* ■ *Һауала .. бал еҫенә тартым әскелтем еҫ бар ине.* Ә. Вахитов.

**ТАРТЫМ**[3] *бәйл. төб. клш. менән* **1.** Хәрәкәттең йүнәлешен белдерә. *Стәрле юлы уларҙы [егеттәрҙе] яланға тартым алып китте.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Билдәле бер ваҡытҡа, мәлгә яҡынлаша барыуҙы белдерә. *Көн көҙгә тартым. Яҙға тартым.* ■ *Таңға тартым усаҡта ут һүрелде.* М. Тажи.

**3.** Кемгә йәки нимәгәлер ыңғайлағанды, тартылғанды белдерә. *Ҡолағыма .. ҡыҙҙың йөрәге Фәтхи һалдатҡа тартым тигән һүҙҙәр инеп ҡалғайны.* С. Агиш.

**4.** *һөйл.* У.-в. клш. аффикстары менән килеп урын яҡынлығын белдерә. *Өйәңке урман тартымында үҫә.*

**ТАРТЫМҺАҠ** *с.* **1.** Туған итеп, яҡын күреп тартҡан, яҡшы мөғәмәлә күрһәткән. *Тартымһаҡ кеше. Тартымһаҡ булыу.*

**2.** *диал.* Ҡыйыуһыҙ, оялсан.

**ТАРТЫНДЫРЫУ** *к.* **1.** Оялтыу, уңайһыҙландырыу. *Кешенән тартындырыу.*

**2.** *әйһ. ф. кар.* **тартыныу.** *Оло кеше алдында тартындыра.*

**ТАРТЫНҠЫ** *с. лингв.* Тел һәм теш ҡатнашлығында әйтелешле (өнгә ҡарата). *Тартынҡы өн. // Һаңғырау тартынҡы. Яңғырауыҡлы тартынҡылар.*

**ТАРТЫНЫУ** *к.* Кешенән оялып уңайһыҙланыу. *Һорарға тартыныу. Тартынып ҡына ашау.* ■ *Ул [Хәҙисә] ирҙәрҙән тартынмай, ауылдағы бер кешенән дә йөҙ йәшермәй.* С. Агиш. *Әсә лә бит буйға еткән улын ҡыҫып ҡосаҡларға тартына.* М. Кәрим.

**ТАРТЫНЫШЫУ** *к. урт. кар.* **тартыныу.** *Тартынышып ултырыу.*

**ТАРТЫП-ЙОЛҠОП** *р.* Теләһә нисек тартҡылап; өҙө-йолҡа. *Тартып-йолҡоп сәс тарау.*

**ТАРТЫП-ҺУҘЫУ** *к.* **1.** Теләһә нисек һуҙғылау, тартҡылау. *Ҡулдәкте тарта-һуҙа киңәйтеү. Тартып-һуҙып оҙонайтыу.*

**2.** һөйл. Әҙ нәмәне көс-хәл менән оҙаҡҡа һуҙыу. *Бесәнде тартып-һуҙып яҙға еткереү.*

**ТАРТЫУ** *к.* **1.** Кемде, ниҙелер тотоп, эләктереп, үҙеңә йәки бер тарафҡа табан көс менән килтереү. *Арҡанды тартыу. Уңға тартыу. Ҡулдан тартыу. Тартып бәйләү. Тартып төшөрөү. Тартып тотоу.* ■ *Эт хужаһының ... салғыйынан ситкә тартты.* Я. Хамматов. *Әҙернә тарттым, уҡ аттым беләкәйемә таянып.* Салауат Юлаев. / Ҡайҙандыр сығарыу, һурыу. *Тартманы тартып асыу.* ■ *[Сынтимер] ағастарҙы .. төбө-тамыры менән тарта ла сығара ти* (Әкиәттән). / Оҙонлоҡҡа, киңлеккә һуҙыу. *Тартып киңәйтеү. Тартып оҙонайтыу.* ■ *Сәскә ҡыҫҡа итәген тырышып-тырышып тарта башланы.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Эләктереп үҙ артынан алып барыу, һөйрәү. *Баржаны тартыу. Сананы тартыу. Арба тартып килеү.* / Йөктө һөйрәү, һөйрәй алыу (транспорт сараларына, йөк малына ҡарата). *Катер насар тарта.* ■ *Күмәк ат .. тигеҙ тартмай ул.* Б. Бикбай. / *күсм. һөйл.* Берәй ауыр эште башҡарыу, үтәү. *Ҡушылған эште ҡарышмай тартыу.* ■ *Быны Ғамир .. хәйләһеҙ тарта, эшләй.* Б. Бикбай.

**3.** Тәбиғи көс менән үҙенә яҡынайтыу, үҙенә табан килтереү. *Магнит тимерҙе тарта.* **Ерҙең тартыу көсө** есемдәрҙең бер-береһенә тартылыу (4 мәғ.) үҙсәнлеге нигеҙендә ерҙең есемдәрҙе үҙенә табан килтереү һәләте.

**4.** Һырыу көсө булыу (ғәҙәттә баҫым айырмаһы нигеҙендә барлыҡҡа килә). *Мөрйә насар тарта.* / Үҙенә һурыу, үҙенә хәрәкәт иттереү. *Упкын төпкә тарта.* ■ *Ҡышҡы көндә бер ҡарабаш тургай килеп инде минең булмәмә. Форточ-*

*канан йылы тартканмылыр, әллә елеме?* К. Даян. / Үҙенә һеңдереү, йотоу. *Тоҙ дымды тарта.*

**5.** Нимәгәлер йәлеп итеү, ылыктырыу. *Укырға тартыу. Эшкә тартыу.* ■ *Һуғышка каршы восстаниеға .. фронт буйындағы крәҫтиәндәрҙе тартырға кәрәк.* Д. Юлтый. / Эшләгән, кылған эш өсөн суд, хөкөм алдына килтереү, яуап алыу. *Хөкөмгә тартыу. Судка тартыу. Яуапка тартыу.*

**6.** Якын итеү, үҙ күреү. *Ярлыларҙы ситкә кағып, байҙы тартыу унда юк.* М. Ғафури. *[Йылан:] Батша кыҙын бирмәне. Һин йылан тип, кыҙы ла мине тартып килмәне.* «Урал батыр».

**7.** Кем йәки нимәгәлер сыкырыу, өндәү. *Күңелем һиңә тарта.* ■ *Калала мин тынғы тапмайым. Кыҫка төнлө йәйге айҙарҙа .. аяктарым тарта тауҙарға.* С. Кулибай.

**8.** Йылы тойғо уятып үҙенә сакырыу, өндәп тороу. *Нисә әйтһәң дә тыуған ер тарта бит, тарта дуҫтар, тарта иптәштәр.* Ә. Вахитов. *Ил тигәнең илле йылдан да үҙенә тарта.* С. Агиш. **Тупрак (*йәки* ер) тартыу** ситтә йөрөгән кеше үҙ иленә кайтып ерләнгәндә әйтелә. / Үҙенә йәлеп итеү, кыҙыкһыныу уятыу. *Иғтибарҙы тартыу. Күңелде тартыу.* ■ *Уйҙарымды тарта кышкы юлдар.* Ә. Гайсин. *Сәнгәт, хас диңгеҙ кеүек, кешеләрҙең күңелен үҙенә тарта.* М. Садыкова.

**9.** Эскә һурыу, эскә алыу. *Тынды тартыу. Эсте тартыу. Уртты эскә тартыу.*

**10.** Тәмәке төтөнөн эскә, үпкәгә һурыу. *Папирос тартыу. Тәмәке тартыу.* ■ *[Талха] тартканда ла киммәтле папиростар, сит ил сигаретары ғына көйрәтә.* В. Исхаков.

**11.** Бау, еп кеүек нәмәне ниндәйҙер араға һуҙыу, һуҙып остарын нығытыу. *Кер элергә бау тартыу. Янга кереш тартыу.*

**12.** Нәҙек итеп буйға һуҙыу. *Кашка кара тартыу. Стенаға филёнка тартыу.* **Һөрмә тартыу** каш, керпеккә кара һөртөү.

**13.** *һөйл.* Һыҙыра һуғыу. *Камсы менән тартыу. Сыбык менән баш аша тартыу.* ■ *[Катын иренә:]Һыйырға тартам тигән булып; сыбырткы менән батшаның беләгенә берҙе һелтәп ал, ти* (Әкиәттән). / Һыҙыра ышкыу (үткерләү өсөн). *Бысакты каҙан ситенә тартыу. Кайракка тартыу.*

**14.** *һөйл.* Музыка коралында уйнау. *Гармун тартыу. Кумыҙ тартыу.* ■ *(Егет) кындан һурып алып, моңландырып тартты курайын.* Х. Ғәбитов.

**15.** Аралап, берәмләп күсереү, шылдырыу. *Счёт төймәһен тартыу.* ■ *Абдулла .. тиҫбеһен шыкылдатып тарта башла[ны].* Һ. Дәүләтшина.

**16.** Игенде тирмәнгә һалып әйләндереү, онтау, онға әйләндереү. *Арыш тартыу. Бойҙай тартыу. Кул тирмәнендә тартыу.* / Эшләү (тирмәнгә карата). *Тирмән тартмай, быуаһы киткән.*

**17.** Билдәле бер якка ыңғайлау. *Тураға тартыу. Урманга тартыу. Һулгарак тартыу. Ялан тарта китеү.* / Билдәле бер якка, урынға күсереү, шылдырыу. *Эскәрәк тартып бәләкәс кенә мейес һалынған.* Ғ. Дәүләтшин. / *күсм.* Үҙ яйына, үҙ файҙаһына бороу. *[Байгилдин:] Ана, һәр турә үҙенә күрә көн күрә, үҙ яғына тарта.* Х. Ғиләжев.

**18.** Үҫештә ниндәйҙер йүнәлеш алыу, ыңғайлау; әйләнеү. *Көн йылыға тарта. Аяҙға тартты. Малдар эрегә тарта башланы.* ■ *Койола япрак, куйыра болот. Көндәр шулай көҙгә тарта.* Ғ. Рамазанов.

**19.** *күсм.* Кемгәлер окшаш булыу. *Фәтхи һалдат төҫкә атаһына тартһа, телгә, эсәләре яғына окшап.., сәсән ине.* С. Агиш.

**20.** *һөйл.* Оҙонлокка, киңлеккә накыҫ булып камасау яһау. *Күлдәктең еңе тар булған, тарта.* / Йыйырыу, корошторою (тирене, тәнде). *Кер һабыны битте корота, тарта.*

**21.** Ирекһеҙҙән вакыт-вакыт тертләү, лебер-ләү (мускулға карата). *Ирен тарта. Күҙ кабағы тарта. Каш тартты.*

**22.** Күпмелер ауырлыкта булыу. *Ике тонна тарткан йөк.* ■ *Алтын балдак ауыр тарта, алты мыҫкалдан арта* (Халык йырынан).

**23.** *һөйл.* Йәрәхәтләү (йырткыс йәнлектәргә карата). *Айыу тарткан мал.* ■ *[Хәйруш:] Фәхрислам .. бүре тарткан бар колокайы өсөн минең башымды һуғып ярҙы.* К. Даян.

**24.** *һөйл.* Һан, күләм яғынан кыҫыу, самалы итеү. *Ашауҙы тартыу. Бесән аҙ, тартыбырак тотоноу.* / *күсм.* Кәмеү. *[Шоңкар:] Бирмә мине, Кушлак батыр. Мине бирһәң, бәхетең тартыр, ырыҫың китер.* К. Мәргән.

**25.** *диал.* Биреү, һоноу. *Карас батыр Акса батырҙың һауытын алып ағаһына тарта, кылы сын үҙе бәйләп ала* (Әкиәттән).

**26.** *һөйл. кар.* **һуҙыу** 4. *Эште ике аҙнаға тартты.*

◆ **Аяк тартмау** *кар.* **аяк** [1]. **Баш тартыу** *кар.* **баш. Кыл тарткан һымак** (*йәки* **кеүек)** 1) туптура булғанды белдергәндә әйтелә. *Кыл тарткан кеүек тура юл көньякка карай китте лә китте.* Ж. Кейекбаев; 2) нескә булғанды, нәҙеклекте белдергәндә әйтелә. *[Атайым] атка көн һайын икешәр йомортка эсерә. Кола кашканың бауыры кыл тарткан һымак нескәрҙе.* С. Кулибай. **Мыйык тартыу** сайыры акһын өсөн ағастың кабығына мөйөшләп юлак сабыу. *[Сайырсы Әнүәр] карағайҙың итләс тәненә мыйык тарта, уртанан һыҙык үткәрә лә осона мөшкәт каҙап куя.* З. Ураксин. **Танау тартыу** танау аша тауышландырып, тын алыу. **Тартып алыу** көслөк менән алыу. *Дошман килһә, ерҙәреңде тартып алыр.* Р. Ниғмәти. **Тире тартыу** *һөйл.* тире иләү эше менән шөғөлләнеү. **Тирмәне шәп** (*йәки* **нык) тарта** *кар.* **тирмән. Тубык тартыу** *һөйл.* тубыкты текә сәнсеү. *Әхмәдулла бабай .. үргәрәк менде лә тау кырына тубык тартып ултырҙы.* Ә. Вахитов. **Һыңар тартыу** *һөйл.* яулыкты уртаға бөкләмәй яурынға төшөрөп бәйләү. **Эс тартыу** *кар.* **эс.**

● *Йән тартмаһа, кан тарта.* Әйтем. *Нәҫел — нәҫелгә, тамыр — тамырға тарта.* Мәкәл. *Тәртәгә кергәс, тарта алмайым тип торма.* Мәкәл.

**ТАРТЫШ** *и.* **1.** Үҙ-ара тарткылашкан алыш; көрәш. *Кулдарына эләккән бер нәмә менән [полицейскийҙарға] бәрергә тотонғандар. Кит-кән тартыш, шау-шыу.* М. Тажи. / *күсм.* Ике аралағы бәхәсле, ғауғалы алыш. *Ә, апрелдә ер бүлгәндәге мәхшәр! Ауылдарҙа ғауға, тартыш хатта һуғыш!* Ф. Иҫәнғолов.

2. Ҡыҙ ҡушҡанда, әхирәттәренең еңгәнән түшәк йәйҙермәҫ өсөн йәки ҡыҙҙы түшәккә ебәрмәҫ өсөн егеттән бүләк алып ризалашҡанға тиклем тартҡылашып талашыу йолаһы.

♦ **Таяҡ тартыш** *кар.* **таяҡ.**

**ТАРТЫШҠАҠ** *с. һөйл.* **1.** Ирекһеҙҙән тартылып-тартылып, ҡорошоп ҡуйыусан. *Тартышҡаҡ аяҡ. Тартышҡаҡ ауыҙлы кеше.*

**2.** Ыңғайға килмәгән, ҡарышҡаҡ.

● *Яман кәзә тартышҡаҡ.* Мәҡәл.

**ТАРТЫШЛЫ** *с.* Тауыш-ғауғалы, бәхәсле. *Йыйылыш бөгөн бик тартышлы булды.* Б. Ишемғолов.

**ТАРТЫШМАҠ** *и. һөйл. кар.* **тартыш** 2.

**ТАРТЫШТЫРЫУ** *ҡ.* Тән, аяҡ-ҡулды ҡайыштырып ҡатырыу; ҡорошторою.

**ТАРТЫШЫУ** *ҡ.* **1.** *урт. ярҙамл. кар.* **тартыу** 1, 2, 11. *Йөктө тартышып килеү. Янға кереш тартышыу.*

**2.** Бер нәмәне кем еңәрҙән икәү-ара тартыу. *Арҡан тартышыу. Таяҡ тартышыу.* ■ *Әбей менән бабайҙың .. кыптыр тун өсөн тартышмай, һуғышмай йоҡлаған саҡтары булмай икән* (Әкиәттән).

**3.** Эткән, тартҡанға бирешмәҫкә тырышыу, ҡарышыу. *Айбулат [арҡаһына һуҡҡанға] бөтә кәүҙәһе менән ҡайҡайып китә, ләкин һаман тартыша.* Һ. Дәүләтшина. / *күсм.* Бәхәс йәки ғауға ҡуҙғатып алышыу; талашыу. *Гелән тартышып кына тормош булмай ул. .. Юл ҡуйырға ла тура килә иргә.* Я. Вәлиев. / *күсм.* Риза булмай талашыу; ҡаршылашыу. *Бына, ҡоҙа, аҙаҡ һүҙ: беләбеҙ аҡсаң барын, бүләк бирмәй тартышһаң, кейҙерәбеҙ таҙ ҡарын* (Туй йырынан).

**4.** Ирекһеҙҙән тартылып-тартылып йыйырылыу (тән ағзаларына ҡарата). *Аяҡ тартыша. Ҡул тартыша. Сикә тартыша.*

**ТАРУТ** *и.* Ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған тарыға оҡшағаныраҡ күп йыллыҡ үлән (ағаслыҡта үҫә, мал яратып ашай).

**ТАРХАН** [*монг.*] *и. тар.* Ырыуҙаштары араһында өҫтөнлөк менән файҙаланып, яһаҡ түләүҙән ҡотҡарылған юғары ҡатлам кешеһе һәм шул кешенең нәҫелдән нәҫелгә күсә торған дәрәжә исеме. *Тархандар заты.* ■ *Башҡорттарҙың рус батшаһына барған илселәре .. батшанан тархан йәки мырҙа исеме алған.* Р. Кузеев, Б. Юлдашбаев.

● *Ат матуры — арҡанда, ҡыҙ матуры — тарханда.* Мәҡәл.

**ТАРХАНЛЫҠ** *и.* Тархан исеме, титулы. *[Әпкәләй:] Беҙҙең олатайҙар борондан изге булып килгән. Хәҙер тарханлыҡ алғандар. Батша тарханлыҡты белмәй бирмәй ул.* Д. Юлтый.

♦ **Тарханлыҡ грамотаһы** тархан исеме биргән танытма.

**ТАРҺАҠ** *с. диал.* Һимеҙ, бушаҡ итле, былҡым.

**ТАРҺЫҒЫУ** (тарһыҡ*ғ*) *ҡ. кар.* **тарығыу** [1].

**ТАРҺЫЛДАТЫУ** *ҡ.* **1.** Тарҫ иттереп бик нығ шартлатыу. *Тарһылдатып атыу.*

**2.** Ярһытып, йөрәген дарҫ-дорҫ типтереү. *Тарһылдатып атын, Аҫылбай тау-урмандар аша саптыра.* М. Тажи.

**ТАРҺЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Тарҫ итеп нығ шартлау. *Тарһылдап мылтыҡ атылды.*

**2.** Ярһып, дарҫ-дорҫ итеү (йөрәккә ҡарата). *Тарһылдап тибеү.* ■ *Болон һуҡмағы буйлап, йөрәгең тарһылдап, бер йүгереп үтеүе үҙе ни тора.* Ф. Рәхимғолова. / *һөйл.* Ярһыу, ҡыҙыу (кешегә ҡарата). *Ул [Сәгиҙә] уларҙы орошоп ташларҙай булып тарһылдап-тарһылдап ҡуйҙы ла, үҙен тыйып ҡалды.* М. Тажи.

**ТАРҺЫНДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Тар тип хис иттереү, тарға һанатыу. *Хыялдар донъяны тарһындыра.*

**2.** *эйһ. ф. кар.* **тарһыныу** 2.

**ТАРҺЫНЫУ** *ҡ.* **1.** Тар, тығыҙ күреү; тарға һанау. *Күңел был донъяны тарһына, әллә ҡайҙа ашҡына ине.* М. Ғафури.

**2.** Кемделер артыҡ күреү, артыҡҡа һанау. *[Мария:] Улай беҙҙә оҡшағас, тора бир, тарһынғаныбыҙ юҡ.* Б. Бикбай. *Күңелдәре бик киң, асыҡ, тарһыныуҙар ят уларға.* Ҡ. Даян.

**3.** *диал. кар.* **күпһенеү** 1. *Яуҙа яулап алған бәхетебеҙҙе дошман тарһына.* Р. Янбулатова.

**ТАРЫ** *и.* **1.** Ваҡ ҡына йомро орлоҡло, киң ҡыяҡ япраҡлы, ялбыр башаҡлы ашлыҡ. *Ҡыҙыл тары. Һары тары. Тары баҫыуы. Тары көлтәһе. Тары сәсеү. Тары урыу.* **Ҡытай тарыһы** киң оҙон япраҡлы һепертке башлы, бик бейек һабаҡлы ашлыҡ.

**2.** Шул ашлыҡтың орлоғо. *Тары бөртөгө. Тары оно. Тары ярмаһы. Тары бутҡаһы. Тары ҡоймағы. Тары онлау.* ■ *Бибеш .. киске тамаҡҡа өйрә бешерер өсөн тары төйә.* З. Биишева.

♦ **Бесәй тарыһы** ваҡ ҡына сәскәле, тығыҙ һепертке башаҡлы оҙонса япраҡлы ҡый үләне (күберәк һөргән ер тирәһендә үҫә). **Йылан тарыһы** ҡыҫҡа һабаҡлы, бер яҡлап төшкән һепертке башаҡлы ҡый үләне. **Турғай тарыһы** *кар.* **дармана.**

● *Бер тарынан бутҡа булмай.* Мәҡәл. *Тауыҡ төшөнә тары ингән.* Мәҡәл.

**ТАРЫҒЫУ** [1] (тарыҡ*ғ*) *ҡ.* **1.** Ниндәйҙер шарттарҙан ялҡыу, тарлыҡ тойоу. *Ул да [Һибәт ағай], яҙ булғас, подвал һауаһынан тарығып, тышҡа сыҡҡандыр.* Д. Юлтый. *Ана, кешнәй, тибенеп күк алаша, аҙбарында ятып тарыҡҡан.* С. Ҡудаш.

**2.** Кем йәки нимәнеңдер булыуынан тарлыҡ тойоу, үҙ итмәй тарһыныу. *Батырҙан ил тарыҡмаҫ.* «Урал батыр».

♦ **Тын тарығыу 1)** һауа етмәй тын ҡыҫылыу. *Тынсыу өйҙә тын тарыға;* 2) тарлыҡ, ирекһеҙлек тойоу. *Дала кешеһенең тау араһында тыны тарыға.*

● *Тамыр тартҡан тарыҡмаҫ.* Мәҡәл.

**ТАРЫҒЫУ** [2] (тарыҡ*ғ*) *ҡ. диал. кар.* **тарыу** [1]. *Яҡшы кешегә тарығыу.* ■ *Йөрөй ҙә генә торғас үйҙәр үйлап, бөтмәҫ ҡайғыларға тарыҡтым* (Халыҡ йырынан).

**ТАРЫЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ысул, алым. *Яңы тарызда эшләү.*

♦ **Шул тарызда** шул рәүешле, шулай итеп.

**ТАРЫҠТЫРЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Тарлыҡ, ҡыҫынҡылыҡ кисерергә мәжбүр итеү, тынын тотоу. *Биклән тарыҡтырыу.*

**2.** *эйһ. ф. һөйл. кар.* **тарығыу** [1] 2.

**ТАРЫКТЫРЫУ** [2] *к. кар.* **тарытыу** 2. *Бәләгә тарыктырыу.*

**ТАРЫТЫУ** *к.* **1.** Тап килтереү; юлыктырыу. *Яҡшы кешегә тарытыу.*

**2.** Ниндәйҙер хәлгә дусар итеү; юлыктырыу. *Ауыр хәлгә тарытыу. Мәшәкәткә тарытыу.*

**ТАРЫУ** [1] *к.* **1.** Осрау, тап булыу; юлығыу. *Яҡшы юлдашҡа тарыу.* ■ .. *Ғәжәп бер нәмәгә тарыным.* М. Ғафури. *Урак урһа, тиҙ үк арый, эштән башы тиҙ үк карый — бәхетһеҙ ирҙәргә тарый үндай килен, тидия* (Бәйеттән).

**2.** Ниндәйҙер хәлгә дусар булыу, юлығыу. *Ауыр хәлгә тарыу. Бәләгә тарыу. Ҡайғыға тарыу.* ■ *Совет ҡояшы балкыны, мәңге ирекҡә тарыныҡ.* К. Кинйәбулатова.

**3.** *һөйл.* Кемдеңдер яҙмышына сығыу, тормошта тура килеү, өләшкә тейеү.

◆ **Ҡапҡан һайын һары май тарымаҫ** тормошта һәр ваҡыт күңелле хәлдәр генә осрап тормаҫ тигән мәғәнәлә әйтелә. **Әмәлгә тарығандай** *шул үк* **әмәлгә ҡалғандай** (*кар.* **әмәл**).

● *Хөрләккә сыҙамаған хурлыкка тарыған.* Мәҡәл. *Яманға тарыма, тарыһаң — арыма.* Мәҡәл.

**ТАРЫУ** [2] *к. һөйл.* Торошло булыу, тиң булыу. *Ауыр юлда бер бот нәмә лә бишкә тарый.*

**ТАРЫУ** [3] *к. иҫк.* Сәсеү, игеү.

● *Арпа тарып, бойҙай үҫмәҫ.* Мәҡәл.

**ТАС** [1] [*рус.* таз] *и.* Йәйенке һай һауыт (кер йыуыу һ. б. өсөн тотола). *Таста кер йыуыу.* ■ *Яурынына .. һөлгө һалып, йышып ағартылған еҙ тас, еҙ комған тотоп, Байрас .. кунаҡтарҙың кулын йыуҙырып сыкты.* З. Биишева.

**ТАС** [2] *р. һөйл.* Барлығы менән, шау, гел, тик. *Ите тас май ғына.* ■ *Елен төбөндәге һөт — иң ҡуйы һөт, тас ҡаймаҡ кына.* Я. Хамматов.

**ТАС** [3] *р. кар.* **сат** [2]. *Мәғәфур уларға [Сәлимдәргә] тас йәбеште.* Ж. Кейекбаев.

**ТАС** [4] *киҫ.* **1.** Сағыштырыу, оҡшатыуҙы көсәйтеп килә; хәс, нәҡ. *Тас атаһы.* ■ *Замандашым, Такташ, аҙ йәшәнең, тас һандуғас булып йырланың.* Б. Вәлит.

**2.** Һүҙгә, фекергә баҫым яһап көсәйтеп килә; нәҡ, тап. *Тас уртаға төшөү. Тас үйләғанса эшләү. Тас уҙ урынына ултырыу.* ■ *Ғүмерем тас алтмыштың яғаһына менеп ултырҙы.* Р. Ниғмәти. **Тас яртыһы** теүәл яртыһы. *Хәҙер йәштәрҙең тас яртыһы тиһәк тә арттырыу булмаҫ, һөйләгәндә халыҡ мәҡәлдәрен төптө телгә алмай һөйләй.* Ғ. Амантай.

◆ **Тас салҡан** тотош арҡа киңлегенә, тотош арҡаға [ятыу]. *Тас салҡан йығылыу.* ■ *Ул [кеше] тас салҡан ятҡан.* Д. Юлтый. **Тас итеү** *һөйл.* уңай итеү, шәп итеү (үсәгәндә әйтелә). **Тас төшөү** *һөйл.* кәрәгенсә булыу, тейешенсә килеп сығыу.

**ТАС** [5] *окш.* Яҫы нәмә менән еүеш нәмәгә йәки тәнгә сәпәгәндә, еүеш нәмәгә баҫҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Тас итеп калыу. Еүеш балсыкка тас итеп төшөү.*

**ТАСАЙ** *с. һөйл.* Сәсе ҡойолған, ялтыр (башҡа ҡарата). *Тасай булыу.* ■ *Тасай башай башын сайкап, һыуҙан караған була.* Р. Ғарипов.

**ТАСАЙЛАНЫУ** *к.* Тасайға әйләнеү, тасай булыу.

**ТАСАУУЫФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Суфыйлыҡ. *Бындағы шәкәрттәрҙең бөтәһе ишанға мөрит булып, тассауыф юлына кереп, тәсбих тартып йөрөй.* М. Ғафури.

**ТАСҠАУ** *к.* **1.** Яҙған майҙы һыуыҡ һыуҙа сайҡау. *Тасҡамаған май тиҙ боҙола.*

**2.** *диал. кар.* **сайҡау** [2] 1. *Кер тасҡау.*

**ТАСҠЫЛДАТЫУ** *к.* Тас-тос иттереү, тас-тос килтереү. *Тасҡылдата баҫыу.*

**ТАСҠЫЛДАУ** *к.* Тас-тос итеү, тас-тос килеү. *Һары балсыҡ аяҡҡа йәбешә, тасҡылдай.*

**ТАСЛАТЫУ** *к.* **1.** Сәпәп һуғыу, тас иттереү. *Таслатып һуғыу.* ■ *Кеслө ел еүеш карҙы таслатып биткә бәрә.* Ш. Насыров.

**2.** *кусм. диал. кар.* **сатнатыу** 3. *Таслатып әйтеү. Таслатып һөйләү.*

**ТАСМА-ТАС** *р.* Ҡара-каршы килеп, йоҙроҡ менән бәрешеп. *Тасма-тас һуғышыу.*

**ТАСНАП: таснап тороу** *диал.* сатнап тороу (*кар.* **сатнау** [1]).

**ТАСНАТЫУ** *к. диал. кар.* **сатнатыу** 3.

**ТАСНИФАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Буш һүҙ, уйҙырма.

**ТАС-ТОС, тас та тос** *окш.* Ҡабат-кабат тас иткән тауышты белдергән һүҙ. *Тас-тос май тасҡау.* ■ *Тас та тос һуғышып киткән еге малайҙы аралауы еңел булмағандыр әсәйемә.* Ш. Янбаев.

**ТАСУИР** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк.* Һүрәт, иллюстрация.

**2.** Кем йәки ниҙеңдер һүрәтләнеше. *[Һөйләүсе] Экиәттең матур тасуирҙарын төшөрөп калдырып, коро .. йөкмәткеһен генә һөйләй ҙә сыға.* Ғ. Амантай. *Кем тием һуң? .. Кем тиһәм дә тасуиры мөмкин түгел, тиңләй алмам, оҡшата алмам, тик уны аңлай күңел.* Д. Юлтый.

□ **Тасуир итеү** һүрәтләү, тасуирлау. *Мин бер хикәйә уҡығайным .. Унда диңгеҙ буйында ҡояш байып барғаны тасуир ителгән ине.* С. Агиш.

**ТАСУИРИ** [*ғәр.*] *с.* Тасуирлауға мөнәсәбәтле. *Тасуири һүҙ. Тасуири итеп һөйләү.*

◆ **Тасуири уҡыу** асыҡ, матур итеп интонация менән уҡыу. *Тасуири уҡыу дәресе.* ■ *Тасуири уҡыу балаларҙа әҙәбиәткә мөхәббәт тәрбиәләй.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1969, № 1.

**ТАСУИРЛАМА** *и.* Ниҙеңдер бөтә рәүеш-сифатын, эстәлеген асып күрһәткән яҙма йәки һүҙ. *Тасуирлама биреү.* ■ *Үзбәкстан Фәндәр Академияһы боронғо кулъяҙмаларға биш томлыҡ тасуирлама баҫып сығарҙы.* Ә. Харисов.

**ТАСУИРЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **тасуирлау.**

**ТАСУИРЛАУ** *к.* Бөтә рәүеше, сифаты, бөтә эстәлеге менән күрһәтеү; һүрәтләү. *Тәбиғәтте тасуирлау.*

**ТАСУИРЛЫ** *с. кар.* **тасуири.**

**ТАСХИХ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Төҙәтмә.

□ **Тасхих итеү** төҙәтеү.

**ТАСЫЛДАТЫУ** *к.* Тас-тос иттереү, тас-тос килтереү, тас-тос иткән тауыш сығарыу. *Тасылдатып һағыҙ сәйнәү.*

**ТЫСЫЛДАУ** *к.* Тас-тос итеү, тас та тос килеү. *Тасылдап торған еүеш балсыҡ.*

**ТАҪҠАҠ** *и. диал.* **1.** Таҙғаҡ.

**2.** Лапаҫ.

**ТАҪКАЛЫК** *и. диал. кар.* **кәштә** 1.

**ТАҪКАУ** *к. диал. кар.* **арбау** 2.

**ТАҪЛАУ** *к.* Тигеҙләп, матур итеп бер нисәгә бөкләү; тәңкләү. *Таҫлап һалыу. Таҫлап өйөп ҡуйыу.* ■ *Әсәйем [Костяларҙың] керҙәрен йыуышты, үтекләште, сумаҙандарына таҫлап һалышты.* Р. Низамов.

**ТАҪМА** *и.* **1.** Тар ғына итеп һуғылған махсус туҡыма (сәс үреү, кейем биҙәү өсөн ҡулланыла). *Ебәк таҫма. Тар таҫма. Яҫы таҫма. Сәс таҫмаһы. Таҫма баҫыу.*

**2.** Шул рәүештә эшләнгән, киҫелгән төрлө оҙон йоҡа тар нәмәләр; лента. *Изоляция таҫмаһы. Ҡағыҙ таҫма. Магнитофон таҫмаһы.*

**3.** Буй булып ятҡан һыҙат. *Офоҡта хәрәкәтһеҙ болоттарҙан юлаҡ-юлаҡ булып ҡара таҫма тартылды.* З. Биишева.

◆ **Таҫма тел** *кар.* **тел.**

**ТАҪМАЛАУ** *к.* **1.** Таҫма ҡуйыу, таҫмалы итеү. *Сәсте таҫмалап үреү. Күлдәктең еңен таҫмалап тегеү.*

**2.** Таҫма рәүешле итеү, таҫма-таҫма итеү. *[Георгий] үҙенең эске күлдәген таҫмалап йыртты.* Ш. Янбаев.

**ТАҪМА-ТАҪМА** *с.* Таҫмаларға оҡшашлы, буй-буй булған. *Таҫма-таҫма булып һыҙылыу.* ■ *Уйһыулыҡта таҫма-таҫма ҡарҙар ята,— әйтерһең дә йәш килендәр кер ағарта.* Ғ. Әмири.

**ТАҪМАУ** *и. кар.* **арҡатау.**

**ТАҪРАЙТЫУ** *к.* Ҙур итеп асыу, аҡшайтыу (күҙҙе).

**ТАҪРАЙЫУ** *к.* Ҙур булып асылыу аҡшайыу, (күҙгә ҡарата). *[Майорҙың] әле генә асыуланып секрәйгән, таҫрайып торған күҙҙәрендә йылмайыу ғәләмәте күренде.* Н. Мусин.

**ТАҪТАҠ** *и.* Төбө ергә теймәһен йәки ҡоламай ултырһын өсөн төрлө нәмәнең аҫтына ҡуя торған ҡулайлама. *Таҫтаҡҡа ҡуйыу. Таҫтаҡҡа ултырыу.*

**ТАҪТАЛАҠАЙ** *р. диал.* Тасма-тас.

**ТАҪТАМАЛ** [*фарс.*] *и.* Бит, ҡул йәки һауыт-һабаны йыуғас һөртә торған махсус туҡыма әйбер. *Аҡ таҫтамал. Буй таҫтамал. Йөнтәҫ таҫтамал. Сигеүле таҫтамал. Киндер таҫтамал. Бит таҫтамалы. Ҡул таҫтамалы.* ■ *Рамазан йыуынып бөтөп, тәнен таҫтамал менән һөртә башланы.* Р. Низамов. **Таҫтамал башы** таҫтамалдың сиккән йәки сүпләп һуҡҡан ике яҡ башы.

◆ **Таҫтамал һалыу** ҡыҙҙы бирергә ризалыҡ белдереп, яусыға бүләк биреү.

**ТАҪТАР** [*фарс.*] *и. иҫк.* **1.** Ырыуҙан ҡалған ҡатын-ҡыҙ башына урай торған бер осо сигеүле оҙон аҡ миткал. *Таҫтарлыҡ тауар. Таҫтар башы сигеү. Таҫтар урау.* ■ *Әбей йәштәрҙең ойпалауынан һүтелеп киткән таҫтарын йүнәтеп, осон әйәк аҫтына ҡыҫтырып, .. көлә-көлә ҡыуанды.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Ҡыҙҙы ҡушҡан еңгәгә кейәү биргән бүләк (яулыҡ, таҫтамал һ. б.). *Ҡыҙ ҡушканда таҫтар бирелә торғайны, тип, былар таҫтар һорай башланы.* М. Буранғолов. / Туй ваҡытында ҡыҙ яғынан ҡайны йортона бүләккә килтерелгән һөлгө, таҫтамал.

◆ **Кендек таҫтары** кендек ҡырҡҡан әбейгә бирелә торған бүләк. *Кендек таҫтарына күлдәклек биреү.*

● *Хәстәрле ҡыҙ таҫтарлы.* Мәҡәл.

**ТАҪЫЛ** *и. кар.* **таһыл.**

**ТАҪЫЛЫУ** *һөйл.* Йөй буйлап бүҫелеп йыртылыу. *Йөй-йөйөнән таҫылыу. Таҫылып сығыу.*

**ТАҪЫР** *с.* Тупайып торған ҙур, аҡыш (күҙгә ҡарата). *Бала өй эсендәге ҡазаны һиҙгән һымаҡ, унһыҙ ҙа таҫыр күҙҙәрен ҙур асып өндәшмәй ултырған кешеләргә ҡарап сыҡты.* Ж. Кейекбаев.

**ТАҪЫРҒАЛАНЫУ** *к. диал. кар.* **ярһыу** 1. *[Алһыуҙың] йөрәге таҫырғаланып дөпөлдәй башланы.* Ғ. Ибраһимов.

**ТАҪЫРЛАУ** *к. кар.* **таһырлау.**

**ТАҪЫРЫҠ** *с. диал.* Таҫыр.

**ТАТ** [1] *и.* Азербайджан Республикаһында, Дағстанда һәм Иранда йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (иран телдәренең береһендә һөйләшә). *Тат халҡы. Тат ҡатыны. Тат теле.*

**ТАТ** [2] *и.* **1.** Бал-шәкәр тәме; шәрбәт. *Бал таты. Шәкәр таты.*

**2.** *күсм. кар.* **тәм** [1] 2. *Тормош таты.*

● *Талымһыҙҙың таты юҡ.* Мәҡәл.

**ТАТА** *и. диал. кар.* **татау** [2] 1.

**ТА-ТА** *оҡш.* Тиҙ-тиҙ ҡабатланған өҙөк-өҙөк ҡаты тауышты белдергән һүҙ (мәҫ. пулемёт тауышы).

**ТАТАЛАУ** *к. диал. кар.* **татау** [1]. *Тирене таталау.*

**ТАТАР** *и.* **1.** Татарстандың төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (төрки телдәренең береһендә һөйләшә). *Татар әҙәбиәте. Татар теле.*

**2.** 13—15 быуаттарҙағы Алтын Урҙа дәүләтенә ингән төрки, монгол һ. б. ҡәбилә халыҡтарының исеме.

● *Татарҙың кейгәнен, башҡорттоң менгәнен ал.* Әйтем.

**ТАТАРҒАУ** *к. һөйл. кар.* **татаурау.**

**ТАТАРЛАШЫУ** *к.* Теле, ғөрөф-ғәҙәте менән татарға әйләнеү. *Татарлашҡан кеше.*

**ТАТАРСА** *р.* **1.** Татар телендә. *Татарса һөйләшеү.*

**2.** Татар халҡына хас рәүештә. *Татарса кейенеү.*

**ТАТАРСАЛАУ** *к.* Татарса әйтеү, һөйләү.

**ТАТАРСАЛАШТЫРЫУ** *к.* Татар теленә хас итеү, татарсаға әйләндереү.

**ТАТАТЫУ** *к. һөйл. йөкм. кар.* **татау** [1].

**ТАТАУ** [1] *к. һөйл.* Ике яҡҡа эттереп, кирҙереп тереү. *Бағананы татау. Ҡарындыҡ тәҙрәне татау. Тирене татау.*

**ТАТАУ** [2] *и.* **1.** Ике яҡҡа эттереп, кирҙереп ҡуйған терәк. *Татау һуғыу.*

**2.** *һөйл.* Тәҙрә тирәсе; рам.

**3.** *диал.* Тағара.

**ТАТАУЛАУ** *к. кар.* **татау** [1].

**ТАТАУРАУ** *к. һөйл.* Арып, йонсоп, ҡуҙғала алмаҫ хәлгә килеү. *Янбайҙың аты татаураған .., тауҙы саҡ барып сыҡҡан.* «Ҡуңыр боға».

**ТАТЛАНЫУ** *к. һөйл.* Татлыға әйләнеү, татлы булыу. *Еләк бешкән, татланған.* ■ *Аһ-зар*

*менән гөжләп иҫкән елдәр таң еленә ҡушылып татланды.* Д. Юлтый.

**ТАТЛЫ** *с.* **1.** Шәкәр, бал тәме булған; шәрбәтле. *Татлы аҙыҡ.* ■ *Беҙҙең ҡоҙа хәлле икән, йыуасаһы баллы икән, ышанмаһаң, ашап ҡара, шәкәрҙән дә татлы икән* (Халыҡ йырынан).

**2.** Тәме яҡшы; тәмле. *Татлы итеп бешереү.* ■ *Ҡунаҡ алдына ҡуялар һыйҙарҙың иң татлыһын.* М. Кәрим.

**3.** *күсм.* Рәхәтлек биргән, ләззәтле. *Татлы өмөт. Татлы тойғо. Татлы хыял. Татлы хәтирә.* // *Татлы йоҡлау.* ■ *Ниндәй яҡшы, ниндәй татлы булды бөгөн төн.* Салауат Юлаев. *Мин шулай моңлана торғас, татлы уйҙарға күсәм.* Ш. Бабич. *Бер ҡайғыһыҙ кеше ятып йоҡлай, беҙҙең татлы йоҡо ҡайҙа икән* (Халыҡ йырынан). / Күңелде иретерлек; йылы, яҡшы. *Татлы һүҙҙәр һөйләү.*

♦ **Татлы тамаҡ** *ҡар.* **тамаҡ. Татлы тамыр** *ҡар.* **тамыр. Татлы тел** *ҡар.* **тел** 2.

● *Аш эйәһе менән татлы.* Әйтем. *Донъя баҫһа, тоҙ ҙа татлыға әйләнә.* Мәҡәл.

**ТАТЛЫҠАЙ** *и.* Ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған, селек япрағына оҡшаш япраҡлы, оҙон татлы тамырлы үлән (тамырын сәйнәп һуралар); тәмлекәй.

**ТАТРАН** *и.* Ҡолаҡтың эстән эренләп шешеүе. *Татран булыу.*

**Татран ҡыҫҡырыу** татранды һамаҡлап имләү (тат-татран татлы икән, таттырманым мин һиңә. Юлаусы күрһә, ирем тир, ҡумырыҡты өйөм тир. Ай ҙа ҡайтты, көн дә ҡайтты, татран ҡолаҡ һин дә ҡайт,— тип имләйҙәр).

**ТАТУИРО́ВКА** [*рус.*] *и.* Буяулы энә менән сәнскеләп, тәнгә төшөргән яҙыу һәм һүрәт. *Татуировка яһау.*

**ТАТҺЫҘ** *с.* Таты, тәме насар. *Татһыҙ аҙыҡ.*

**ТАТЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Туҡтауһыҙ атҡан пулемётҡа ҡарата әйтелә. *Алыҫта туптар гөрһөлдәй, пулемёттар .. татылдап ала.* А. Таһиров.

**2.** Өҙмәй теҙеп һөйләү. *[Низам — Мәрйәмгә:] Татылдама, мин бит әле һиңә ир, нигә ул тиклем һикеренәһең.* М. Тажи.

**ТАТЫЛДЫҠ** *с. һөйл.* Күп һөйләүсән. *Татылдыҡ бала.*

**ТАТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **татыу** [1] 2, 3. *Тыңлаусылар [күҙе алдынан] Соколов баярының күрһәткән йыртҡыслыҡтары, граждандар һуғышы ваҡытында татылған аҙаптар .. бер-бер артлы үттеләр.* Б. Бикбай.

**ТАТЫМ** *с. һөйл.* Бер татып ҡарарлыҡ күләмдәге. *Бер татым тоҙ юҡ.*

**ТАТЫМЛЫ** *с.* Үҙенсәлекле тәме булған, татлы. *Татымлы сәй.*

**ТАТЫР** *и.* **1.** Һыу йәки тупраҡтағы тоҙ. *Һыуҙың татыры.* ■ *Юл .. татыры сығып, ағарып ятҡан яланғас ерҙәр аша бара.* И. Көсәнҡол. *Көтөр батырҙың һыйыры татыр яларға сыҡҡан* (Легенданан).

**2.** (*йәки* **аҡ татыр**) Тупрағы тоҙло ер. *Юрмый буйҡайҙары аҡ татыр аҡ, татырҡайҙарҙа мал ятыр* (Халыҡ йырынан).

**3.** *диал. ҡар.* **юшҡын** 1.

**4.** *диал. ҡар.* **ҡаран** 2.

**ТАТЫРҒА** *и. ҡар.* **татырлан.**

**ТАТЫРЛАН** *и.* Татырлы ерҙә үҫә торған ҡара-ҡаршы быуынтыҡ һабаҡлы, ваҡ япраҡлы, башаҡ һымаҡ сәскәле үлән.

**ТАТЫРЛАУЫҠ** *и. ҡар.* **татырлыҡ.**

**ТАТЫРЛЫ** *с.* Татыры бар; тоҙло, әсе. *Татырлы ер. Татырлы булыу.* ■ *Ул күлдән кеше бер тамсы ла һыу эсә алмаған. Үтә татырлы булған уның һыуы.* З. Биишева.

**ТАТЫРЛЫҠ** *и.* Тупрағы татырлы ер. *Татырлыкта үлән насар үҫә.*

**ТАТЫРҺЫҘ** *с.* Татыры юҡ; тоҙһоҙ, йомшаҡ. *Татырһыҙ һыу. Татырһыҙ булыу.*

**ТАТЫРТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **татыу** [1]. *Донъяның әсеһен күп татытты.* ■ *[Әсәйем] Көйәнтәләп ташып, шишмәләрҙең тәмен татытҡан.* Х. Назаров.

**ТАТЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Ауыҙға ҡабып тәмен ҡарау, тәмләү. *Аштың тоҙон татыу. Сәйҙең шәкәрен татыу.*

**2.** Ауыҙ итеү; ашау. *[Хәкимйән:] Сабира апайҙа ай буйы торҙоҡ. Күпме яҡты йөҙөн күрҙек .. татлы һыйҙарын татыныҡ.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** *күсм.* Башыңдан үткәреү; күреп белеү, кисереү. *Бәхет татыу. Донъяның әсеһен-сөсөһөн татыу. Рәхәтлек татыу. Үҙ елкәңдә татыу.* ■ *Илле йәш — ул ирҙең тормош татып, ныҡ сынығып еткән бер сағы.* Б. Вәлит. *Бар ҡайғыһын, бар шатлығын татып китәм был ерҙең* Р. Ғарипов.

**ТАТЫУ** [2] *ҡ.* Тәм өсөн асы, татлы нәмә ҡушыу. *Шәкәр булмағанда [әсәйем] ҡорот, йөҙөм кеүек нәмә татып ҡына сәй эсә.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТАТЫУ** [3] *ҡ.* Ниндәйҙер бер тәм булыу, нимәнеңдер тәме килеү. *Балтырған төбө бал татыр, көпшә генә төбө көл татыр* (Халыҡ йырынан).

**ТАТЫУ** [4] *ҡ. һөйл. ҡар.* **тарыу** [2]. *Бер йылы ике йылға татырлыҡ хәл.*

**ТАТЫУ** [5] *с.* Үҙ-ара талаш-тартышһыҙ, яҡшы мөнәсәбәттә булған. *Татыу ғаилә. Татыу күршеләр.* // *Татыу ғүмер итеү. Татыу тороу. Татыу эшләү.* ■ *Алты бала үҫкән бер семьяла, улар шулай татыу булғандар: берҙә йырлап, берҙә уйнап-көлөп, берҙә улар баҡса ҡорғандар.* М. Хәй.

♦ **Татыу уйыны** йәштәр уйыны (уйнаусылар ҡушлап ултыра; алып-барыусы һәр парҙан татыулыҡтарын һорай; татыу булмағаны үҙенә кемдеңдер ҡушын һората; теге ебәрмәһә, уға бер төрлө яҙа бирелә; яҙаға түҙмәгән кеше ҡушын биреп ебәрә).

**ТАТЫУЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Ике араны татыулыҡҡа килтереү; татыуға әйләндереү, татыу итеү.

**ТАТЫУЛАШЫУ** *ҡ.* Үҙ-ара татыулыҡҡа килеү; татыуға әйләнеү, татыу булыу. *Ыҙғышып, илашып алабыҙ, тағы татыулашабыҙ.* М. Кәрим.

**ТАТЫУЛЫҠ** *и.* Үҙ-ара татыу булған хәл. *Татыулыҡ китте. Татыулыҡ кәрәк.* ■ *Бер әсәнән тыуған балалар һымаҡ татыулыҡ менән көн күрәбеҙ.* С. Ҡудаш.

♦ **Татыулыҡ уйыны** *шул уҡ* **татыу уйыны** (*ҡар.* **татыу** [5]).

**ТАУ** *и.* **1.** Бейеклеге менән тирә-яҡтағы кимәлдән айырылып торған ҡалҡыу урын. *Бейек тау. Осло тау. Сусаҡ тау. Һөҙәк тау. Тау башы*

*Тау аркаһы. Тау бите. Тау итәге. Тау һырты. Тау тәҙеме.* ■ *Уралкайҙан бейек ай тау булмаҫ, Уралкайҙы һөймәҫ йән булмаҫ* (Халыҡ йырынан). / Шул урында булғанды йәки үҫкәнде, йәшәгәнде белдерә. *Тау бөркөтө. Тау йылғаһы. Тау йыуаһы. Тау мүге. Тау халкы.* ■ *Оҙаҡ карап торҙом һокланып мин, хыялымдай матур тау кыҙын.* Х. Ҡунаҡбай.

**2.** Бер урынға йыйылған, күп, бейек итеп өйөлгән нәмә. *Ҡар тауы. Ҡом тауы. Болот тауҙары өйөрөлөп килә.* **Тау кеүек** (*йәки* **һымаҡ, хәтле, саҡлы, кәҙәре**) *йәки* **тауҙай** ниҙеңдер күплеген белдергәндә әйтелә. *Тау ҡәҙәре эш.*

**3.** Ер аҫты эштәренә ҡағылғанды, бәйле булғанды белдерә. *Тау инженеры. Тау эшселәре. Тау промышленносы.*

♦ **Ҡаф тауы** *кар.* **ҡаф. Ҡыҙҙар тауы** яҙ көнө ауыл ҡыҙҙары сығып уйнаған тау. **Тау аҡтарырҙай** (*йәки* **емерерҙәй**) бик ҙур көскә ҡарата әйтелә. **Тауға сығыу** ҡарҙан асылған тау битенә уйынға йыйылыу йолаһы. **Тау етене** *кар.* **етен. Тау тамыры** *кар.* **тамыр. Тау тишеге** мәмерйә. **Тау һағыҙы** *кар.* **һағыҙ. Тау ыҫмалаһы** *кар.* **мумия** [2].

**ТАУАР** *и.* **1.** *эк.* Һатыу өсөн етештерелгән әйбер, продукт. *Тауарҙың киммәте. Тауар әйләнеше. Тауар етештереү. Тауар алмашыу.*

**2.** Һатыуға тәғәйенләнгән нәмә. *Үтемле тауар. Аҙык-түлек тауары. Көнкүреш тауары. Тауар хаҡы. Тауар тейәү.* ■ *Магазиндарҙа ул тауар, ул тауар — төрлө тауар, ни нәмә теләй йәндәрең — шуларҙың бары ла бар.* Р. Ниғмәти.

**3.** Һатыуҙағы туҡыма. *Буй тауар. Йөн тауар. Ҡалын тауар.* ■ *Эре биҙәкле тауар беҙҙең магазинда ла бик ятмай.* С. Агиш.

♦ **Үтмәҫ тауар** бер кемгә лә ярамаған йәки бер ҡайҙа ла һыймаған кешегә ҡарата әйтелә.

**ТАУАРЛЫҠ** [1] *и. эк.* Һатыу өсөн тауар етештереү һәләте. *Хужалыктың тауарлык йәһәтенән үҫеүе.*

**ТАУАРЛЫҠ** [2] *с.* Һатыу өсөн тәғәйенле. *Тауарлык иген.*

**ТАУАРЛЫҠЛЫ** *с. эк.* Һатыу өсөн тауар етештереүгә һәләтле. *Тауарлыклы хужалык.*

**ТАУ-БАЙЫҠТЫРЫУ** *и.* Ер аҫты байлыҡтарын табыу һәм эшкәртеүгә бәйле булғанды белдерә. *Тау-байыктырыу комбинаты.*

**ТАУИС** *и.* Сағыу сыбар төҫтәге, матур оҙон ҡойроҡло, фазандар ғаиләһенә ҡараған йылы яҡ ҡошо.

**ТАУЛЫ** *с.* **1.** Тауҙары күп булған. *Таулы ил.*

**2.** *и. мәғ.* Тауҙа, тауҙар араһында йәшәгән кеше. *Таулы халкы. Таулылар араһында йәшәү.*

**ТАУЛЫҠ** *и.* Таулы урын. *Был тирә — таулык. Үҙәндәрҙең бирьягында .. бер-береһенә тереләшеп кенә ултырған сукайтма тауҙар килә.* Р. Солтангәрәев.

**ТАУЛЫҠАЙ** *и. диал.* Ҡаҡы.

**ТАУРАТ** [*ғәр.*] *и.* Йәһүдтәрҙә Муса пәйғәмбәрҙең төп тәғлимәте аңлатылған китап. *Мәнсух булыр хәҙер иҫке диндәр, иҫке таурат, иҫке доғалар.* М. Ғафури.

**ТАУСИӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кәңәш.

□ **Таусиә итеү** кәңәш итеү. *Таусиә итәм һиңә мин: инде ысын һүҙле бул.* Ш. Бабич.

**ТАУСЫ** *и.* Ҡаҙылдыҡ байлыҡ сығарыу эшендәге эшсе. *Таусылар .. яңы биш йыллык иҫәбенә алтын сығара.* М. Хәйҙәров.

**ТАУ-ТАУ** *с.* Нимәнеңдер күплегенә баҫым яһап әйтелә. *Тау-тау көлтә. Тау-тау иген. Тау-тау кейем.* ■ *Игенен һуғып, тау-тау итеп мәғәзәйгә ташып күйғандар.* М. Тажи.

**ТАУ-ТАШ** *и. йыйн.* Тау һәм таштар; таулы, ташлы урын. *Тау-таш араһы. Тау-таш актарыу.* ■ *Һыу ярып, тау-таш тетрәтеп .. һәүбән донъяға сыккан.* «Аҡбуҙат».

**ТАУҺЫТЫУ** *к. һөйл.* Ниҙелер самаһыҙ күп тотоноп, ныҡ кәметеү.

**ТАУҺЫУ** *к. һөйл.* Ныҡ кәмәү. *Ике яктан да көстәр тауһығас, коралдары һынып юғалып бөткәс .. бер-береһенең боғаҙҙарынан алып һуғышкандар* (Легенданан).

**ТАУШАЛАНЫУ** *к. диал.* Таушалыу.

**ТАУШАЛДЫРЫУ** *к.* **1.** Ойпалап күркен бөтөрөү, бәҫен ебәреү. *Кейемде таушалдырыу.* ■ *Мин инде бер нисә хат яҙып, кеҫәлә йөрөтөп таушалдырып, йыртып ташлағайным.* З. Ураҡсин.

**2.** *күсм.* Һаулыҡты, сәләмәтлекте алыу, йонсотоу. *Ауыр эш нык таушалдырған.*

**ТАУШАЛЫУ** *к.* **1.** Бөтәрләнеп күркһеҙ төҫ алыу; ойпаланыу. *Таушалған күлдәк. Таушалған дәфтәр.* ■ *Ҡыҙҙың кейем-һалымы таушалып, лыҫтырап бөткән. Шуға ул донъяға сыға алмай ултыра, ти* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Ауыр тормоштан йәки эштән йонсоп, төҫ ташлау; бирешеү. *Ул [Хәлиулла] ошо арала булған ваҡиғаларҙан .. нык таушал[ды]. Ике-өс көн эсендә йыллығын картайҙы ла куйҙы.* И. Ғиззәтуллин.

**ТАУШАУ** *к. һөйл.* **1.** Бөтәрләп, йомарлап күркен бөтөрөү; таушалдырыу. *Кейемде таушау.* / *күсм.* Әрһеҙләү, ҡәҙерһеҙләү. *Ниңә кай сак изге хыялдарҙы буш һүҙҙәргә бутап таушаным?* Р. Бикбаев.

**2.** *күсм.* Ауыр тормош йәки эш менән йонсотоу; таушалдырыу. *Майор Дауытовты таныманым. Уны һуғыш арыу таушаған: култык таяк, биттә бураҙналар, сәсенә кырау төшә башлаған.* Б. Бикбай.

**ТАУЫҠ** *и.* Ите һәм йомортҡаһы өсөн аҫралған йорт ҡошо. *Баҫкан тауык. Супайлы тауык. Тауык ите. Тауык йомортҡаһы. Тауык себеше. Тауык кетәге. Тауык ояһы. Тауык фермаһы.* ■ *Тауыктарҙың капыл кыткылдаша башлауына Тәнзилә әбей .. йүгерә-йүгерә тышка сыкты.* М. Тажи.

♦ **Күшеккән тауыҡ** меҫкен генә булып ебеп торған кешегә әйтелә. **Ҡыр тауығы** *кар.* **ҡор** [1]. **Мысыр тауығы** аҡ, буҙ йәки күк сыбар төҫлө, һалынып торған ҡыҫҡа ҡойроҡло, яланғас башлы, һыңар мөгөҙлө йорт ҡошо (сығышы Африканан, бөтә илдәрҙә аҫрала). **Күл тауығы** *диал. кар.* **һыу тауығы. Өй** (*йәки* **көл**) **тауығы** өйҙә ултырыусан, өйҙә ултырырға яратҡан кешегә әйтелә. **Тауыҡ баш** *кар.* **баш** 2. **Тауыҡ йылы** мөсәл йыл иҫәбендә унынсы йыл (*кар.* **мөсәл**). **Тауыҡ күҙ** *кар.* **күҙ. Тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫ** (*йәки* **бөтөрлөк түгел**) күп, ваҡ нәмәгә ҡарата әйтелә. *Өйҙә катын-кыҙҙың эше тауык сүпләһә*

*лә бөтөрлөк түгел.* **Тултырған тауыҡ** 1) тиреһе менән ите араһына һытылған йомортҡа һәм төрлө тәмләткес тултырып бешергән тауыҡ; 2) йоп-йомро кәүҙәле кешегә әйтелә. **Һыу тауығы** көрәнһыу һыртлы, күк буҙ түшле, оҙон ғына аяҡлы ҡыҫҡа ҡойроҡло һыу ҡошо (сыйырсыҡтан бәләкәйерәк; томбойоҡ япраҡтары өҫтөнән йүгереп йәки һыуҙа йөҙөп йөрөй).

**ТАУЫҠСЫЛЫҠ** *и.* Тауыҡ аҫрау, тауыҡ үрсетеү эше. *Тауыҡсылыҡ фермаһы.*

**ТАУЫШ** *и.* **1.** Йән эйәләренең тамағынан сыҡҡан өн. *Бала тауышы. Көлгән тауыш. Ҡалын тауыш. Нәҙек тауыш. Ҡош тауышы. Мал тауышы. Эт өргән тауыш. Тауыштан таныу.* ■ *Күп тә китмәнем: «Сәлих!» — тип ҡысҡырған тауыш ишеттем.* С. Агиш. *Малдар туҡһан туғыҙ тауыш менән аҡыра.* Ш. Шәһәр.— *Уй, бала ғынам! Ҡайһы ерҙәрҙә генә ятып ҡалды икән... Буҫыҡҡан тауышы менән һыҡранды әсә.* Ж. Кейекбаев. *Һандуғаскай һайрай тирәктә, тауыштары китә йыраҡҡа* (Халыҡ йырынан). **Кәзә тауышы** йәмһеҙ нәҙек тауышҡа ҡарата әйтелә.

**2.** Кеше тамағынан сыҡҡан музыкаль өн. *Тауышты һынау. Тауышты юғалтыу.* ■ *Мин тауышты күтәргәндән күтәрҙем, моңландырҙым. Көйҙөң аҙағын үҙемдән өҫтәп, моңло тауыштар һуҙып бөтөрҙөм.* Д. Юлтый. *Төрлө күнекмәләр яһап, тауышты аскандан һуң Нигмәт Ярулловичпианино өҫтөнә ҡуйылған ноталарҙың бер нисә данаһын йырсыларға таратып бирҙе.* М. Садыҡова. / Музыкаль әҫәрҙең билдәле бер юғарылыҡтағы көйө. *Ике тауышлы романс. Дүрт тауышҡа яҙылған хор әҫәре.*

**3.** Механик тирбәлештең ҡолаҡҡа ишетелгән сағылышы. *Аяҡ тауышы. Гармун тауышы. Ишек тауышы. Ҡурай тауышы. Ҡыңғырау тауышы. Шишмә тауышы.* ■ *Доңғорлаҡ тауышына ҡушылып, ҡола бейәнең бышҡырғаны ишетелә.* В. Әхмәҙиев. / Асыҡ беленмәй, бер төрлө дөйөм геүләүгә әйләнгән өндәр ауазы. *Ел тауышы.*

**4.** *физ.* Һауа йәки бүтән мөхит бөртөксәләренең тирбәлеше. *Тауыш теорияһы. Тауыш тиҙлеге.*

**5.** Тәртипһеҙ күмәк ҡысҡырыш; шау-шыу. *Тауыш тынды.* ■ *Бик ҙур тауыш ҡупты, һәр кем үҙенсә ҡысҡыра башланы.* Б. Ишемғол. / Талаш-ҡысҡырыш, ғауға. *Тауыш сығарыу.* ■ *Ҡунаҡтар алдында тауыш күтәрмәҫ өсөн Бибикамал еңгә асыулы һүҙҙәрен әйтмәне.* А. Карнай.

**6.** Дәүләт һәм йәмәғәт ойошмаларында ҡаралған мәсьәлә буйынса фекер белдереү хоҡуғы. *Хәл иткес тауыш.* ■ *Питер эшселәре ауыр хәлде үҙгәртеү өсөн тарихи көрәш алып барҙы. Беҙ ҙә үҙебеҙҙең тауышты күрһәтеү өсөн урамдарға сығырға, демонстрация яһарға тейешбеҙ.* Д. Юлтый. **Тауышҡа ҡуйыу** мәсьәләне ыңғай һәм ҡаршы кешеләр һанына ҡарап хәл итергә тәҡдим итеү. / Шул хоҡуҡтың ғәмәлләшеү һөҙөмтәһе. *Тауышты иҫәпләү. Күпселек тауыш менән үтеү.*

**7.** *күсм.* Эске бер тойғоноң ҡушыуы. *Күңел төбөнән выждан тауышы һәр саҡ уның был уйын кире ҡаға килде.* З. Биишева.

♦ **Бер тауыштан** берҙәм рәүештә, бер күңелдән. *Ҡотлогужа Кусимов бер тауыштан колхоз председателе итеп һайланды.* Ғ. Әмири. **Тауыш биреү** 1) өндәшеү, ҡысҡырыу. *[Ҡарт] ҡысҡырҙы.., ат юлына елпәнләп сыҡты ла тағы тауыш бирҙе.* Ғ. Хәйри; 2) Һайлауҙа ҡатнашып, кем йәки нимәгәләр ыңғайлыҡ белдереү. *Дәүләт тормошоноң айырыуса мөһим мәсьәләләре бөтә халыҡ тикшереүенә сығарыла, шулай уҡ бөтә халыҡтың тауыш биреүенә [референдумға] ҡуйыла.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. **Тауыш итеү** өндәшеү, ҡысҡырыу. **Тауыш ялғау** *этн.* ҡайны менән кеше аша аҡса биреп һөйләшеү (яңы оҙатылып килгән киленгә ҡарата).

**ТАУЫШЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Тауыш сығартыу. *Һалдат .. тауышландырмай ғына йоҙаҡты киҫеп, иптән кенә һандыҡты асты, ти* (Әкиәттән).

**ТАУЫШЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Тауыш сығарыу. *Тауышландыҡ, буғай. Ире минең барғанды һиҙҙе, мығырлап ҡатынын һүкте.* Д. Юлтый.

**2.** Шау-шыу ҡуптарыу, ҡысҡырыу. *Кемдер ярҙам һорап ҡысҡырҙы, кемдер һүгенде, тауышлана башланылар.* Ә. Вахитов. / Талаш сығарыу, ғауғалашыу. *[Ямал:] Советҡа барып, минең өҫтән ошаҡлап йөрөйһөң, тип, тағы тауышланыр инде ул.* М. Тажи. *[Хәжәрғә — Хәмди:] Дауыт ташлап сығып киттеме?! Кисә тауышланғанығыҙҙы яҙа-йоҙа ишетеп ҡалғайным.* Ш. Янбаев.

**ТАУЫШЛЫ** *с.* **1.** Тауыш менән белдерелә торған. *Тауышлы сигнал.*

**2.** Тауыш сығара йәки барлыҡҡа килтерә торған. *Тауышлы кино.*

● *Ҡатының тауышлы булһа, ҡолаҡҡа көс.* Әйтем.

**ТАУЫШ-ТЫН** *и.* Уяулыҡ, терелек билдәһе; тауыш һәм тын. *Тауыш-тын сығармай, хужа эфәнде .. йоҡоға талды.* Ф. Иҫәнғолов. / Ҡолаҡҡа салынырҙай ул-был тауыш. *Ейәнсура йоҡлай, тауыш-тын юҡ .. әкрен генә көҙгө таң ата.* Б. Ишемғол.

**ТАУЫШ-ТЫНҺЫҘ** *с.* Тауыш-тын сығармаҫ; шым. *Тауыш-тынһыҙ кеше. // Тауыш-тынһыҙ барыу. Тауыш-тынһыҙ ултырыу.* ■ *Бөгөн ул [Сәғиҙә] бер кем менән дә һөйләшмәне, тауыш-тынһыҙ ғына башын баҫып эшләп тик ултырҙы.* М. Тажи. *Сабыр, һалмаҡ, тауыш-тынһыҙ ғына күк йөҙөндә тулған ай йөҙә.* М. Ғафури.

**ТАФСИЛ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **тәфсил.**

**ТАХИЛ: тахил шарабы** игендән ҡыуылған шарап; араҡы. *Тахил шарабын аҙыраҡ һалып алғас инде, уға диңгеҙ тубыҡтан.* Ш. Насыров.

**ТАҺАУЫЛ** *и. ҡар.* **таһыл.**

**ТАҺРАЙЫУ** *ҡ. ҡар.* **таҫрайыу.**

**ТАҺРАНЛАТЫУ** *ҡ.* Тыны бөткәнсе ашыҡтырыу, ныҡ ашыҡтырыу. — *Атыңды таһранлатып ҡыума, соҡор-саҡыр ерҙе яйлап ҡына сыҡ.* М. Тажи.

**ТАҺРАНЛАУ** *ҡ.* Тын бөткәнсе ашығыу, ныҡ ашығыу.

**ТАҺЫЛ** *и.* Эште белеп, ыңғайына, яйына килтереп эшләү сифаты. *Флаглы ылауҙан йылдам һикереп, шат йөҙлө Фатима төштө, атын ҡапыл бороп, арбаһын ирҙәр таһылы ме-*

*нән еңел генә ауҙарҙы.* Я. Вәлиев. *[Бабай:] Анау балтам һынғандан һуң таһылым бөттө, уландар.* К. Мәргән.

**ТАҺЫЛЛАНЫУ** *к.* Таһыллыға әйләнеү, таһыллы булыу. *Беҙҙең разведчиктар ҙа таһылланып китте. Улар һиҙҙермәй генә дошман тылына үтеп, кәрәкле мәғлүмәттәр .. алып ҡайта башланы.* Т. Кусимов. *Бәйгегә етер алда һәр бер йүгерек ат таһыллана торғайны. Был етеҙлеген тағы ла арттыра төштө. Уның һайын мин уға [атҡа] дәрт бирә киләм.* Д. Юлтый.

**ТАҺЫЛЛЫ** *с.* Таһылға эйә, таһылы бар. *Таһыллы кеше.* ■ *Таһыллы әсә райкомдан ауыл хужалығы институтына направление ла алып килгәйне.* Я. Вәлиев. // *Бәйҙән ысҡынып, аунаҡлап ятҡан бүрәнәләрҙе ул [Дания] бағорын ирҙәрсә таһыллы ҡаҙап, һөйрәп ала ла тимер сыбыҡ менән нығытып бәйләп ҡуя.* Й. Солтанов.

**ТАҺЫЛЛЫҠ** *и. кар.* **таһыл.** *Ул ергә атып бәрәм тигәндә генә, Фәхри көрәшселәргә хас таһыллыҡ менән әйләнеп егеттең өҫтөнә төштө.* Б. Бикбай.— *Ҡайҙан килде миңә шул тиклем дәрт, көс, ҡыйыулыҡ, таһыллыҡ! Туптарҙы һикереп тә, йығылып та эләктереп тик торам, берәүен дә [ҡапҡаға] индермәнем.* Ғ. Шәрипов.

**ТАҺЫЛҺЫҘ** *с.* Эштең ыңғайын, яйын белмәгән; ҡулайһыҙ.

**ТАҺЫРЛАТЫУ** *к.* Таһыр-тоһор иттереү, таһыр-тоһор килтереү. *Арбаны таһырлатып һөйрәү.* ■ *[Майор:] Дошманды таһырлатып ҡыуып барып, йылғаның арғы яғына сығарып ебәрҙек.* Ә. Ихсан.

**ТАҺЫРЛАУ** *к.* Таһыр-тоһор итеү, таһыр-тоһор килеү. *Таһырлап килеү.* ■ — *Сеү .. Нимә таһырлай? — тине Фәсхи.. Ул арала булмай артына әйләнеп ҡараһа, бер һыбай кеше быларға тапы дап етеп тә килә.* Т. Йәнәби.

**ТАҺЫР-ТОҺОР** *оҡш.* Ҙур, ҡаты нәмәне тигеҙһеҙ ҡаты ерҙән һөйрәгәндә, тәгәрләткәндә һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Таһыр-тоһор итеү. Тигеҙһеҙ юлда арба таһыр-тоһор килеп тәгәрләй.*

**ТАЧА́НКА** [*рус.*] *и.* Граждандар һуғышы ваҡытында һыбайлы ғәскәр ҡулланған пар атлы, пулемётлы еңел, етеҙ арба. *Пулемёт тачанкаһы.*

**ТАШ**[1] *и.* **1.** Тотош масса йәки айырым киҫәк рәүешендәге сүкелмәй, иремәй торған һәр тау тоҡомо. *Аҡбур ташы. Ҡайраҡ ташы. Әзбиз ташы. Ҡая таш. Ҡырсын таш.* ■ *Таштуғай йылғаһы буйында .. тап-таҡыр таулы, ялангас таштан ғына бөткән бейек урындар ҙа күренеп кала.* Ғ. Дәүләтшин. *Һөнәрсе әҙләнеүен дауам иткән. Һаман шулай тауҙар, далалар гиҙгән. Ер ҡаҙған, таш аҡтарған.* З. Биишева.

**2.** Шул тау тоҡомоноң айырым киҫәге. *Аҫыл таш. Матур таш. Мунса ташы. // Таш келәт. Таш күпер. Таш юл.* ■ *Сәғәттең тышы көмөш, өҫтө алтын һәм төрлө таш менән биҙәкләнгән.* Д. Юлтый. *Степан ҡулына бик ҙур аҡ таш тотоп, .. һелтәп ебәргәйне, ул Мөлөк ағайҙың башына саҡ ҡына теймәй, сыжлап уҙып китте.* Т. Хәйбуллин. *Порт-Артур тигән таш ҡала тороп ҡалды дошманға* (Бәйеттән). **Ваҡ таш** ваҡланған тау ташы; гравий. **Иген ташы** тапатып ашлыҡ баҫа торған тешле таш. **Йәй ташы** халыҡ ырымынса, һыу һипһәң йәки һуҡһаң, ямғыр яуҙыра торған тылсымлы таш. **Йәшен ташы** *кар.* **йәшен. Күбек таш** күҙле-күҙле булып торған еңел таш. **Ҡәбер ташы** ҡәбер өҫтөнә ҡуйылған яҙыулы таш. **Мамыҡ таш** сүсләнеп торған тау ташы; тау етене. *«Мамыҡ таш» һүҙенең Әбйәлилдә осрауы бер ҙә ғәжәп түгел, сөнки унда был минерал күптән билдәле булған.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 7 ноябрь. **Тирмән ташы** аҫлы-өҫлө ике ҡат ҡуйып, он тарттыра торған ауыр түңәрәк таш. **Һарыҡ таш** *кар.* **һарыҡташ.**

**3.** Эске ағзаларҙа барлыҡҡа килгән ҡаты матдә. *Бауыр ташы. Бөйөр ташы. Ҡыуыҡ ташы.*

**4.** Мәғдән ҡатнашып ҡатҡан тау тоҡомо; руда. *Баҡыр ташы. Көмөш ташы. Тимер ташы.* **Инә таш** мәғдәнле таш.

**5.** *с. мәғ.* Ер аҫтында баҫылып ҡатҡан киҫәк хәлендәге (минераль атамаларға ҡарата). *Таш күмер. Таш тоҙ.*

**6.** *с. мәғ. күсм.* Ҡатып ҡалған, хәрәкәтһеҙ, туң. *Таш күҙ.* / Ҡатып ҡалған, ҡаты. *Таш ҡорһаҡ. Таш маңлай.* / Ҡаты хисле, аяуһыҙ. *Таш бәғер. Таш йөрәк.*

♦ **Нигеҙ ташы** ниҙеңдер төп терәге, башланғысы. *«Яңы юл» журналы башҡорт әҙәбиәтенең нигеҙ ташын һалды. Ул башлаған юл менән хәҙер инде әҙәбиәттең нык ҡына үҫкәнен күрҙек.* Т. Йәнәби. **Тамағыңа таш торғоро** ҡарғағанда әйтелә. **Таш борсаҡ** һаран кешегә ҡарата әйтелә. **Таш күмер дәүере** таш күмер ятҡылыҡтары барлыҡҡа килгән палеозой дәүеренең дүртенсе дәүере. **Таш ҡапсыҡ** *кар.* **ҡапсыҡ. Таш ҡабаҡ** *кар.* **ҡабаҡ**[2] 2. **Ташҡа баҫыу** типографик ысул менән баҫыу. **Ташҡа үлсәйем** 1) кешенең зәғиф, сирле ерен үҙ тәнеңдә күрһәтеп һөйләгәндә шундай уҡ хәлдән үҙеңде ҡурсалау өсөн әйтелә; 2) кәмһетеп, юҡҡа сығарып һөйләгәндә әйтелә. *Аһ-аһ, ташҡа үлсәйем, Өфө тигәндәре ошо икән. «Аҙашырлыҡ яман таш ҡала»,— тип һөйләүҙәре ерле буш икән.* Ғ. Амантай. **Таш ҡәләм** *кар.* **ҡәләм** 1. **Таш табан** *кар.* **табан** 1. **Таш таҡта** *кар.* **таҡта. Таштан йүкә һуйыу** *кар.* **йүкә. Ташын ашау** 1) туймаҫтай булыу. *Һис нәмәне ҡуймай, ташын ашаған*; 2) *бойр. к. ф.* берәй аҙыҡты бирмәгәндә, бирергә теләмәгәндә әйтелә. *Ташын ашаһын немец, бөртөгөн дә [бирмәнем], ҡыярымды ла, бәрәңгемде лә.* Ж. Кейекбаев. **Яра ташы** азот кислотаһының тоҙо; нитрат.— *Элек ни, бер ер ҡырҡылһа, көл һалып, яра ташы ҡырып, аҙҙырып йөрөгәнбеҙ икән.* С. Агиш.

**ТАША** *и. диал. кар.* **ышыҡ** 1. *Елдән таша урын.*

**ТАШБАЙ** *и. диал.* Ташбаҡа.

**ТАШБАЙЫУ** *к. диал.* Ташмайыу. *Ташбайып ултырыу.*

**ТАШБАҠА** *и.* Ҡалын ҡабырсаҡлы, ҡыҫҡа аяҡлы эре ер-һыу йәнлеге; гөбөргәйел. *Диңгеҙ ташбаҡаһы. Һаҙ ташбаҡаһы.*

**ТАШБАШ** *и.* **1.** Ҡара сыбар төҫтәге ваҡ йылға балығы; ҡотөрткөс. *Балаҡтарҙы йыйнаҡ һыҙғанып, ҡармаҡ һалдыҡ тыныс йылғаға. Тик бер генә ташбаш тотһаҡ та һөрән һалдыҡ бөтә ту-*

*гайга.* М. Сөндөклө. *[Малайҙар] йыйнаулашып, тотондолар ташбаш ауларга.* Ғ. Амантай.

**2.** *диал.* Этеш.

**ТАШҠЫН** I *и.* **1.** Ҡар, боҙ иреп йәки оҙаҡ ямғыр яуып ташҡан һыу. *Көҙгө ташҡын. Яҙғы ташҡын.* ■ *Аҡселән ташҡыны алдындағы ҡаршылыҡтарҙы емереп, сүп-сарҙы .. ағыҙып алып китте.* Б. Бикбай.

**2.** *күсм.* Ниҙеңдер ярһыу көскә эйә булған тулҡыны. *Нәфрәт ташҡыны. Революция ташҡыны.* ■ *[Мифтах:] Күкрәгемә йылы ташҡын килеп тулды, әйтерһең дә ҙур теләгем ҡабул булды.* К. Мәргән.

II *с.* **1.** Ташып аҡҡан. *Ташҡын йылға.* ■ *Ҡарҙар ирегәс, Агиҙел ташты. Урман, болондо ташҡын һыу баҫты.* Н. Нәжми.

**2.** *күсм.* Ярһыу. *Ташҡын хис.* ■ *Ташҡын йөрәк тулап китте.* М. Тажи.

**ТАШҠЫНЫУ** *ҡ.* Ярһып тулҡыныу, нык ярһыу; алҡыныу. *Күңел ташҡына.* ■ *Үткәндәргә ҡайтһам, ҡан ташҡына минең, иптәштәр.* Р. Ниғмәти.

**ТАШЛАМ** *и.* Ташлап еткererлек ара. *Егет Баҡый ауылын сығып, таяҡ ташлам ер китмәне, тауға үрелде.* Ж. Кейекбаев. *Бер таш ташлам самаһы йөҙөп барғас, улар [малайҙар] үҙенән-үҙе туҡтай.* К. Мәргән.

**ТАШЛАМА** *и.* Кемгә йәки нимәгәлер ҡарата ни менәндер аҡланған кәм талап. *Экономик ташлама.* ■ *Беҙҙең әҙәбиәт йәш әле, беҙҙә ундай кәмселектәр булыр инде»,— тип үҙебеҙгә үҙебеҙ ташлама яһай торған осор артта ҡалды инде.* Ә. Вәли.

**ТАШЛАНДЫ** *с. ҡар.* **ташландыҡ.**

**ТАШЛАНДЫҠ** *с.* Ҡарамай, файҙаланмай ташланған. *Ташландыҡ ер. Ташландыҡ кейем. Ташландыҡ өй. Ташландыҡ булыу.* ■ *Был кеше йөрөмәй торған ташландыҡ юлда дошмандың осрау ҡурҡынысы булмаһа ла, улар бер нәмә лә һөйләшмәне.* С. Ханов. // *Кеше лә, мал да йөрөмәгәс, .. урамды күпереп үҫкән бәпкә үләне ҡаплаған. Бөтөнләй ташландыҡҡа әйләнгән ауылдың берҙән бер йәме ине был.* Н. Мусин. *Ул [суртан] әле генә таҙартылған балыҡтың ташландыҡтарын ашарға килгән, күрәһең.* Д. Бураҡаев.

**ТАШЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ташлау.** *Ырғытылған, ташланған нәмәләрҙе алыусы, ерҙән күтәреүсе юҡ.* Д. Юлтый. *Ҡапҡа иңенә асып ташланған.* Ә. Харисов.

**2.** Үҙ-үҙеңде аҫҡа йәки ниҙеңдер эсенә ташлау, ырғыу. *Һыуға ташланыу. Ярҙан ташланыу.* ■ *— Әсәмдең тереләтә утҡа ташланыуы бөгөн булһа йөрәгемде һыҙлата.* Т. Хәйбуллин. *Беҙ .. йүгереп барып, диңгеҙгә ташланабыҙ.* Ғ. Аллаяров.

**3.** Бик етеҙ хәрәкәт менән ынтылыу; атлығыу. *Ишеккә ташланыу. Яуға ташланыу. Ярҙамға ташланыу.* ■ *Сәгиҙә шаулап ҡотороноп аҡҡан Ташлыйылғаға һәм .. бер ярҙан икенсе ярға ташланған тулҡындарға ҡарап, яр башында тороп ҡалды.* М. Тажи. *Беҙ, бөтәһен онотоп, тауыш килгән яҡҡа ташландыҡ.* Й. Солтанов. / Кинәт көслө теләк тыуып, берәйһен ҡосаҡларға, берәйһенә һыйыныырға һ. б. ынтылыу. *Ҡосаҡҡа ташланыу.* ■ *Асатай килеп инде.— Һау ҡайттыңмы, Айбулат ағай? — тип, уға ташланды. Улар ҡосаҡлашып күреште.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Ҙур тиҙлек менән һөжүм итеү. *Аҡбаш ҡапыл төйлөгөнгә ташланды, инде эләктерҙем тигәндә генә, тегеге ысҡынып ҡотолдо.* Ә. Бикчәнтәев. *Варандар ҡайһы саҡ хатта кешеләргә лә ташлана икән.* Д. Бураҡаев. *Ҡулыбыҙҙа патрон бөткәс, штык менән ташландыҡ* (Бәйеттән). *Аждаһа ажғырып. Килтәймәргәнгә ташланған* (Әкиәттән).

♦ **Күҙгә ташланыу** *шул уҡ* **күҙгә салыныу** (*ҡар.* **күҙ**).

**ТАШЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ташлау.** *Ғәҙәтте ташлатыу. Имсәк ташлатыу.* ■ *[Ҡыҙ:] Үгәй әсәм мине ошо урманға килтереп ташлатҡан* (Әкиәттән).

**ТАШЛАУ** *ҡ.* **1.** Ҡулда тотоп, һелтәп осороу; бәреү. *Ташлап ебәреү.* ■ *Ул [Фатима] .. ҡағыҙ аҡсаларҙы услап-услап бай алдына ташлай.* Б. Бикбай. / Түбәнгә алып осортоу; төшөрөү. *Бомба ташлау. Якорь ташлау.* ■ *Ҡатындар ултырмаһа ла ҡараптар бата... Ниңә ул саҡта .. ҡорбан ташламайҙар.* З. Биишева.

**2.** Ситкә йәки артҡа табан киҫә ҡайырыу. *Аяҡ-ҡулды ташлап ятыу. Башты артҡа ташлау.* ■ *[Исхаҡ] һалдат йөрөшө менән яурындарын артҡарак ташлап, шыҡ баҫып .. бара.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Йәһәт рәүештә ҡайҙалыр күсереү, йүнәлтеү. *Ғәскәрҙе һуғышҡа ташлау.* ■ *Тормош мине алыҫ ташлаһа ла һеҙ сыҡмаҫһыҙ минең уйымдан.* М. Ғафури. / *күсм.* Таратыу, һибеү (күләгә, нур кеүек нәмәгә ҡарата). *Йомшаҡ ҡара сәстәр Зөлхизәнең зифа буйын тотош ҡаплап, аҡ ебәк күлдәгенә ҡара күләгә ташлай.* З. Биишева.

**4.** Ҡайҙалыр бер ситкә тотоп атыу; бырғау, ырғытыу. *Кейемде иҙәнгә ташлау. Ҡағыҙҙы сүплеккә ташлау.*

**5.** Кәрәкһеҙ нәмә рәүешендә ҡулланыштан сығарыу. *Әсәкәйем биргән тәңкәне биҙәктәре бөтмәй ташламам* (Сеңләүҙән). / Бәйләнеште, мөнәсәбәтте өҙөп, ситтә ҡалдырыу. *Дуҫты ташлау. Илде ташлау. Өйҙө ташлау.* ■ *Урал туправҡтары кире тарта Таштуғайҙы ташлап ҡайтырға* (Халыҡ йырынан). / Ниндәйҙер эш, ҡылыҡты ҡалдырыу. *Тәмәке ташлау. Уҡыуҙы ташлау. Эште ташлау.* ■ *Егерме бишенсе көнгә еткәндә бейә һыуалған, ҡолон да имеүен ташлаған була.* М. Ғөбәйҙуллин.

**6.** *күсм.* Киҫкен итеп ҡапыл әйтеү. *Реплика ташлау. Әсе һүҙҙәр ташлау.* ■ *[Әмирханов:] Фәйзуллиндың миңә ташлаған был мәсхәрәләүен протоколға яҙып ҡуйыуығыҙҙы талап итәм.* С. Агиш.

**7.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһындағы ҡайһы бер һүҙҙәр менән ҡушар ҡылым яһай. *Алып ташлау. Алып барып ташлау. Килтереп ташлау. Тышҡа сығарып ташлау.*

**8.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһындағы төп һүҙ менән ярҙамлыҡ ҡылым сифатында килеп, эш-хәрәкәттең тулылыҡ, киҫкенлек мәғәнәһен белдерә. *Аҡтарып ташлау. Күмеп ташлау. Онтап ташлау. Өйөп ташлау. Сисенеп ташлау. Туҡмап ташлау. Һөйләп ташлау. Эшләп ташлау.* ■ *Иртә*

*менән күбәләкләп ҡар яуа, ер өҫтөн ағартып ташлай.* Д. Юлтый.

♦ **Баш ташлау** *ҡар.* **баш** 1. **Бысраҡ ташлау** *ҡар.* **бысраҡ** I 3. **Күҙ ташлау** *шул уҡ* **ҡараш ташлау** (*ҡар.* **ҡараш** 1). **Төҫ ташлау** *ҡар.* **төҫ** 3.

● *Эткә һөйәк ташлаһаң, шыңшымаҫ.* Мәҡәл.

**ТАШЛАШЫУ** *ҡ.* **1.** Бер-береңә ниҙер ташлау. *Ҡар ташлашып уйнау.*

**2.** Бер-берендә ташлау. *Һөйөп-һөйөп ташлашыуҙан түгел ине уйҙарым* (Халыҡ йырынан).

**3.** *күсм.* Киҫкен итеп ҡапыл әйтешеү. *Һүҙ ташлашыу.*

**ТАШЛЫ** *с.* Ташы күп булған. *Ташлы юл.* ■ *Юлым тағы ташлы тауға еткәс, мин әйләнеп, артҡа ҡараным.* С. Кулибай. *Һаҡмарҙа йылға ташлы икән, Искәндәр ҡара ҡашлы икән* (Халыҡ йырынан).

**ТАШЛЫҠ** *и.* Таш күп булған ер. *Аҡты йылға, .. үтте дала һәм урмандар аша, үтте йырып тауҙар ташлығын.* Н. Нәжми. *Герман ере гел ташлыҡ, юҡтыр уларҙа ашлыҡ* (Бәйеттән).

**ТАШМАЙТЫУ** *ҡ.* Ташмыҡ итеү; кәпәйтеү. *Эсте ташмайтыу.*

**ТАШМАЙЫУ** *ҡ.* Ташмыҡ булыу; кәпәйеү. *Ҡорһағы ташмайып тора. Эс ташмайғанса ашау.*

**ТАШМЫҠ** *с.* Ташып, кәпәйеп торған (эскә ҡарата).

**ТАШСЫ** *и.* **1.** Таштан төрлө нәмә яһаусы. *Шафиҡ бик тиҙ оҫта ташсы булып китә. Ул эшләгән тирмән, сар таштары тирә-яҡта дан ала.* Ә. Вахитов.

**2.** Таш, кирбестән йорт, бина һалыусы. *Ташсылар бригадаһы.* ■ *Ялан ине был урында — килде ташсылар, күмәкләшеп улар бында ҙур йорт һалдылар.* М. Сөндөклө.

**ТАШТАБАҠ** *и.* Йәйпәк ауыҙлы һай аш һауыты; тәрилкә. *Бәләкәй таштабаҡ. Өлкән таштабаҡ. Тимер таштабаҡ.* ■ *Нәсимә киске сипарат ҡаймағын таштабаҡ менән килтереп ултыртты.* Һ. Дәүләтшина.

**ТАШТАБАН** *и.* Сабатаға ҡуйылған ағас күтәрмә. *Малайҙар аяҡтары һыуланмаһын өсөн сабаталарына таштабан таҡҡан.* Ғ. Хәйри.

**ТАШТУРҒАЙ** *и. диал.* Таш турғайы (*ҡар.* **турғай**).

**ТАШТЫРЫУ** *ҡ.* Билдәле кимәлдән арттырыу. *Ҡаҙандағы ашты таштырыу. Һыйырҙар еләндәрен таштырып ҡайта.*

**ТАШЫҒЫС** *и.* Ниҙер ташый торған машина. *Йөк ташығыс. Тупраҡ ташығыс.*

**ТАШЫЙ** *и. диал.* Гөбөргәйел.

**ТАШЫЛДЫҠ** *и.* Һыу ташып һалған нәмә. *Йылға ташылдығы. // Ташылдыҡ ком. Ташылдыҡ тупраҡ.*

**ТАШЫЛМА** *и. ҡар.* **ташылдыҡ.**

**ТАШЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **ташыу** [1]. *Ташылған ашлыҡ. Ташылған бесән.*

**ТАШЫН** *и.* **1.** Малдың эс ташыу ауырыуы. *Һыйырҙы ташын һуҡҡан.*

**2.** *диал. ҡар.* **ташҡын** I 1.

**ТАШЫНЫУ** [1] *ҡ.* Үҙ нәмәңде күтәреп-күтәреп ташыу. *Яңы өйгә ташыныу.*

**ТАШЫНЫУ** [2] *ҡ. ҡайт. ҡар.* **ташыу** [2] 1, 2. *Ташынып аҡҡан йүгерек һыуҙарҙай, таш урамдан улар ағалар.* Ғ. Амантай.

**ТАШЫТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ташыу** [1]. *Киләткә иген ташытыу. Утын ташытыу.*

**ТАШЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Өлөшләп-өлөшләп икенсе урынға алып барыу. *Бесән ташыу. Йөк ташыу. Эшселәрҙе эш урынына ташыу.* ■ *Мин көндәге хеҙмәтем буйынса, контролёрға төргәк-төргәк ситса ташыйым.* С. Агиш. *Иң элек туғайҙа, һыу баҫа торған ерҙәрҙә ултырған бесән кәбәндәре бирге яҡҡа ташып алынды.* Б. Бикбай. *Ул матур ҡыҙ Сафия ҡоймаҡ ташый ҙа сәй яһай.* Ш. Бабич. *Был ҡыҙ төнө буйы һыу ташый, ә сапсаҡта һыу артмай* (Әкиәттән).

**2.** Кешенән кешегә еткереү. *Хәбәр ташыу. Һүҙ ташыу.* ■ *[Мозой:] Бының теле булмаһа, күҙен ҡарға суҡыр ине... Ошаҡ ташып, баяр тупһаһында теҙ сүгеп, тамағын туйҙыра.* Д. Юлтый.

**ТАШЫУ** [2] *ҡ.* **1.** Тәүге кимәлдән артып, ярҙан сығыу (һыуға ҡарата). *Ҡотлояр Ырғыҙ ташҡан саҡта дүрт ауылдың волосҡа бара торған юлын ташҡын өҙәсәге тураһында һөйлә[не].* Һ. Дәүләтшина. *Тротуарҙар буйлап гөрләүектәр ташып аҡты.* С. Агиш. *Асылы күл ташып, тирә-яҡты тотош баҫа торған булған* (Әкиәттән).

**2.** Һауыт ситенән артып сығыу. *Эркет таша.* ■ *— Һуң, ҡара, ҡара, һөтөң таша бит, һапыр тиҙерәк!* Т. Хәйбуллин. *Һабаларҙан ташты ҡымыҙ, бал бөкөләрҙе атты.* Б. Бикбай.

**3.** Тулышып, тығыҙ булып, ҡапайыу (эскә ҡарата). *Эс ташҡанса ашау.*

**4.** *күсм.* Ҙур күләм алыу (көскә, тойғоға һ. б. ҡарата); ярһыу. *Дәрт таша. Тойғо таша. Ташып барған йөрәк. Ташып торған көс.* ■ *Бер минутта ташты күңелем, бер минутта булды ут.* Ш. Бабич. *Моңайтмасы, һары һандуғасым, ташып бара минең һағышым* (Халыҡ йырынан).

♦ **Күҙ ташыу** *ҡар.* **күҙ. Ҡан ташыу** *ҡар.* **ҡан** [1]. **Талаҡ ташыу** *ҡар.* **талаҡ** [1].

● *Бәләкәй йылға ташһа, кисеү бирмәй кисергә* Әйтем.

**ТАШЫУ** [3] *с. ҡар.* **ташҡын** II. *Ташыу йылға.*

**ТАШЫУСЫ** *и.* Ниҙер ташыу менән шөғөлләнгән кеше. *Иген ташыусы. Йөк ташыусы. Хат ташыусы. Һыу ташыусы.* ■ *Һәр көн һалдаттар үлеп тора. Уларҙы күмеүсе лә, ташыусы ла юҡ.* Д. Юлтый.

**ТАШЫШЫУ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **ташыу** [1]. *Бесән ташышыу. Утын ташышыу.*

**ТАӘЗӘЛ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Сиге булмаған боронғо дәүер. *Таәзәлдән бире беҙ башлыҡ һорап, кәррә-кәррә зар илап ҡылдыҡ теләк.* Ш. Бабич.

**ТАЯҠ** *и.* **1.** Ике башынан ҡырҡылған ботаҡһыҙ нәҙек ағас. *Имән таяҡ. Йыуан таяҡ. Кәкре таяҡ. Оҙон таяҡ.* ■ *Айбулат ҡулындағы таяҡ менән бер һелтәп өлгөрмәне, эт уның көпө салғыйын йырта тешләп тә алды.* Һ. Дәүләтшина. *— Мин был диаграммаларҙы,— Сәғиҙә ҡурһәткес таяғы менән төртөп күрһәтте,— дәрестә күрһәтмә материал итеп файҙаланам.* М. Тажи. *Ҡул эйәһе йоҡлап ятҡан айыуға таяҡ менән берҙе ҡундырып алған, ти* (Әкиәттән). / Таянып йөрөй торған нәмә. *Ҡул таяғы. Саңғы таяғы. Тимер таяҡ.* ■ *Сатанлап, таяҡҡа таянып, ип-*

*тәштәрем эргәһенә ҡайттым.* Д. Юлтый. **Ҡултыҡ таяғы** һыңар аяғы өҙөлгән йәки аяғы ауыртҡан кеше ҡултыҡ аҫтына ҡуйып, таянып йөрөй торған таяҡ. **Таяҡ күтәреү** һуғыр өсөн киҙәнеү; ҡул күтәреү.

**2.** Оҙонлоғо 2,134.метрға тиң булған элекке үлсәү берәмеге; сажин. *Ат ҡуҙғалды. Ун таяҡтай ер киткәс, Дауытов артына боролоп ҡараны.* Б. Бикбай. / Шул берәмек менән үлсәнгән майҙан йәки күләм. *Бер таяҡ ер. Ике таяҡ эрҙәнә.* ■ *Нәби ҡулак .. Шәмси әбейгә бер пирәйәз урынына һигеҙ таяҡ ҡына тары сәсеп биргән.* Ә. Вәли.

♦ **Ауыртмаҫ башҡа тимер таяҡ** *ҡар.* **ауыртыу. Май таяҡ алыу** уйындан ҡасҡан өсөн билдән таяҡ менән ҡыҫып күтәрә торған яза алыу. **Таяҡҡа атландырыу** алдау, һемәйтеү. *[Ишмырҙа менән Хөсәйендә] нисек тә кешене отоп, таяҡҡа атландырып, үҙҙәренә мул, яҡшы табыш сығарыу уйы.* К. Мәргән. **Таяҡ тартыш** уйын исеме (табанға табан терәшеп, ҡапма-ҡаршы ултыралар ҙа, таяҡҡа тотоноп, бер-береһен күтәреп торғоҙорға тырышалар). **Таяҡ тығыу** яман уй менән зыян яһау. **Таяҡтың ауыр** (*йәки* **ыуан) башы төшөү** (*йәки* **эләгеү**) ниҙеңдер иң ауыры, ҡыйыны тура килгәндә әйтелә. *[Йыйылышта ла] таяҡтың ауыр башы промысла мөдиренә төштө.* Ғ. Ибраһимов. **Туғыҙ таяҡ** *ҡар.* **сәсрәтмә. Шайтан таяғы** ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған тарбаҡ-торбаҡ күк һабаҡлы, осо сәнскәкләнеп бөткән япраҡлы, алһыу күк йомро сәскәле сүп үләне.

● *Ҡарт кешенең ни байлығы — таяғы ла тамағы.* Әйтем. *Эт өрә тип, таяҡ күтәреп булмаҫ.* Әйтем.

**ТАЯҠЛАУ** *ҡ.* Таяҡ менән туҡмау. *Әйтешә, ҡысҡырыша торғас, һуғыша башланылар. Ҡарттар йәштәрҙе таяҡламаҡсы булды.* И. Ғиззәтуллин.

**ТАЯҠЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **таяҡлау.** *Берен-бере ислах ҡылып ҡуйыу түгел, ҡыҙыңҡырап киткәндә таяҡлашыу.* Аҡмулла.

**ТАЯҠСА** *и.* **1.** Формаһы менән оҙонсараҡ һыҙыҡсаға оҡшаған бактерия; бацилла. *Себер язваһы таяҡсаһы. Туберкулез таяҡсалары.*

**2.** *анат.* Кеше һәм умыртҡалы хайуандарҙа күҙҙәге селтәр ҡатламының формаһы менән оҙонсараҡ һыҙыҡсаға оҡшаған яҡтылыҡ тойоу күҙәнәктәре.

**3.** *ҡар.* **таяҡсыҡ** 1.

**ТАЯҠСЫҠ** *и.* **1.** Бәләкәй генә таяҡ. *Барабан таяҡсығы. Дирижер таяҡсығы. Беренсе класс балалары дәрестә ҡуллана торған таяҡсыҡтар.*

**2.** *һөйл.* Вертикаль йәки ҡыя һыҙыҡ рәүешендәге яҙыу билдәһе. *Дәфтәргә таяҡсыҡтар һыҙыу.*

**ТАЯЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **таяу** [1]. *Таялған ҡойма.*

**ТАЯНҒЫС** *и. ҡар.* **яндауыр.**

**ТАЯНДЫРЫУ** *ҡ.* Таянырға мөмкинлек биреү, рөхсәт итеү. *Таяҡҡа таяндырыу.* ■ *Айбулат .. бәләкәй ҡыҙын түбығына таяндырып, түрҙә аяҡ салып, ғаиләһе менән ыумас әсеп ултыра ине.* Һ. Дәүләтшина.

**ТАЯНСЫҠ** *и. этн.* Килен йортҡа төшкәндә ҡәйнәһе биргән аяҡлы мал (килен арбанан шул малға таянып төшә).

**ТАЯНЫС** *и.* **1.** Ныҡлап баҫыр, таяныр урын йәки нәмә; терәк. *Таяныс табыу.* ■ *Уҡкындан сығырға теләп, тағы тыбырсынып ҡарағайным, таянысымды юғалтып, элеккегә ҡарағанда ла шәберәк аҫҡа төшә башланым.* З. Хиҫмәтуллин.

**2.** (*йәки* **арҡа таянысы**) *күсм.* Ярҙам итерлек кеше. *[Атайым] күп ваҡыт мине үҙе менән алып китә, ни өсөн тиһәң, мин уның берҙән-бер ҡул ярҙамсыһы, таянысы инем.* С. Кулибай.

**ТАЯНЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡул йәки башҡа нәмәгә терәлеп, кәүҙәнең ауырлығын һалыу. *Ергә таяныу. Терһәккә (йәки терһәк менән) таяныу.* ■ *Зөләй әбей таяғына таянып, ҡалтырана-ҡалтырана Ҡолморҙа старшинаның алдына килде.* Т. Хәйбуллин. *Әлтәф өҫтәленә таянған, ә янында тора Йәмилә.* Ғ. Хәйри. / Ҡулды, усты кәүҙәнең берәй өлөшөнә терәү. *Бөйөргә таяныу. Яңаҡҡа таяныу.* ■ *Таянып эйәккә, күҙ текәп йыраҡҡа, ултырам уйланып бер үҙем бер яҡта.* Ш. Бабич. / Йөрөгәндә ниҙелер кәүҙәгә терәк итеү. *Таяҡ таянған бер ҡарт килеп, Сәғиҙә менән күреште.* М. Тажи. *Ырғыҙ йылға буйын ай буйланым, таянырға таяҡ тапманым* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Эш, ҡылыҡта терәк итеп, кемгәләр һалышыу; арҡаланыу. *Дуҫтарға таяныу. Колхоз ярҙамына таяныу.* ■ *[Бабай:] Ҡарттар үлеп бөткәс, был донъя кемгә таяныр икән? Йәштәргә ышаныс бик әҙ бит.* Ш. Шәһәр. *Иҫ китерлек эштәр эшләнек Салауат тигән ергә таянып* (Халыҡ йырынан). / Уй-фекереңә, эш, ҡылығыңа нигеҙ итеп алыу; нигеҙләнеү. *Архив материалына таяныу. Фәнни-техник прогресс ҡаҙаныштарына таянып, эш итеү.* ■ *[Сәғиҙә:] Мин ошо диаграммаларға таянып, үҙебеҙҙең «Ҡыҙыл партизан» колхозы миҫалында эш күрәм.* М. Тажи.

♦ **Ҡаҡҡа таяныу** *ҡар.* **ҡаҡ** [1].

**ТАЯНЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **таяныу.**

**ТАЯУ** [1] *ҡ.* Башын сәнсә ҡуйып һөйәү, терәү, терәтеү. *Ҡойманы таяп ҡуйыу. Әбейҙәр ҡолғаны өрләккә таяп, йөн иләй.*

**ТАЯУ** [2] *и.* **1.** Ниҙелер күтәртеп йәки һөйәп ҡуйған нығытма; терәү. *Таяу һуғыу.* ■ *Забой нығытылмаған, таяуһыҙ ҡалдырылған ере аяҡ аҫтына ишелеп төшкән.* Я. Хамматов. *Яр башынан икенсе ситәнһеҙ-ниһеҙ, бер мөйөшлө ергә ингәс, аумаһын өсөн ике таяу ҙа һуғылған, түбә трансалары ла бик һирәк кенә бер өй бар.* Ғ. Минһажев.

**2.** *күсм.* Ярҙам итерлек, таянып эш итерлек кеше; таяныс. *Ғәзимә, үҙенең бер балаһы ла булмауына ҡарамай, ошо оло йорт хужалығында үҙәк таяуҙарҙың береһенә әйләнгән.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Тар ергә таяу** кеше күп ергә инеп тығылғаn кешегә ҡарата әйтелә.

● *Ир бала — атаһына таяу, ҡыҙ бала — әсәһенә таяу.* Әйтем.

**ТАЯУЛЫ** *с.* Таяп ҡуйылған; терәүле. *Таяулы өй.*

**ТЕАТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Тормош ваҡиғалырын драматик рәүештә кәүҙәләндергән сәхнә сәнғәте. *Драма театры. Опера театры. Ҡурсаҡ театры.* ■ *Театр — йәнле сәнғәт, хәрәкәтле сәнғәт.* М. Мәһәҙиев.

2. Тамаша әҫәрҙәре, спектаклдәр ҡуйыу менән шөғөлләнгән ойошма. *Театрҙа эшләү.*

3. Спектакль һәм башҡа тамаша әҫәрҙәре ҡуйылған бина, шулай уҡ сәнғәт әҫәре, спектакль үҙе. *Театрҙа уйнау. Театр ҡарау. Театр ҡуйыу.. Театр залы.* ■ *Театрҙа һалҡын. Шуға ҡарамаҫтан халыҡ күп килгән.* Б. Бикбай. — *Былтыр Өфөнән артистар килеп, театр ҡороп кит[те].* М. Тажи.

**ТЕАТРАЛЬ** [*рус.* театральный] *с.* Театрға, театр эшенә мөнәсәбәтле. *Театраль сезон. Театраль тәнҡит. Театраль музыка. Театраль студия.*

**ТЕАТРЛАШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **театрлаштырыу.** *Театрлаштырылған әҫәр. Театрлаштырылған тамаша.*

**ТЕАТРЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Театрға, сәхнәгә ҡуйыу өсөн яраҡлаштырыу. *Романды театрлаштырыу. Эстрада программаһын театрлаштырыу.*

**ТЕГЕ (тегенең, тегегә, тегене, тегенән, тегендә; *күпл.* тегеләр)** *күрһ. а.* **1.** Иҫтә, һүҙҙә бер тапҡыр булған кеше йәки нәмәгә киренән тоҡҡанда әйтелә. *Улар [һалдаттар] теге иҫке кейемдәрҙе лә аҡсаға һаталар.* Д. Юлтый. / Күҙҙә тотолған бер кеше, нәмә йәки төшөнсәгә тоҡҡанда әйтелә. *Теге ваҡытта. Теге ерҙә.* ■ *Гөлйөҙөм .. оялып ҡыҙарҙы. Теге яҡта һөйләшкән Исхаҡ менән Яланбикә уларҙы күргән кеүек тойолдо.* Һ. Дәүләтшина. **Ана теге** ситтәрәк, алыҫтараҡ булған бер кеше йәки нәмәгә тоҡҡап күрһәткәндә әйтелә.— *Ана теге урамда беҙҙең өй.*

**2.** *эйл. ф.* **тегенеһе** Бер нисә кеше йәки нәмәнең береһен айырып күрһәткәндә әйтелә. *Кемдер бер ҡыҙ баланы күпергә табан һөйрәкләй. Тегенеһе йән әсеһенә тарткылаша.* И. Ғиззәтуллин.

♦ **Һеҙ** (*йәки* **һин**) **теге** кемдеңдер ҡылығын, һүҙен саманан артыҡ күргәндә әйтелә. *[Зөһрә:] Әллә дача ла алдығыҙмы? [Камилә:] Һин теге, бигерәк, өйө лә дачаһы ла бер юлы ..* С. Ҡудаш.

**ТЕГЕ-БЫЛ** *йыйн. а.* Теге һәм был; төрлө. *Теге-был хәбәр. // Тегене-быны белергә тырышыу.* ■ *[Әминә әбей:] Әҙерләгән кәфенлектәремде, хәйерлектәремде алам, әммә, теге-был хәл булһа, мине атайың эргәһенә алып ҡайтып ҡуй.* Н. Мусин.

**ТЕГЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **тегеү**[1] **1.** *Ҡаласа тегелгән күлдәк.* ■ *Кейемдәреҙең береһе лә беҙҙең буйға ҡарап тегелмәгән.* Д. Юлтый.

**ТЕГЕЛӘЙ** *р.* **1.** Теге яҡҡа. *Тегеләй ҙә, былай ҙа сайҡау.* ■ *Ҡала урамынан бер тегеләй, бер былай үткән халыҡты ҡарап, .. тупһала ултырабыҙ.* Т. Йәнәби.

**2.** Эш-хәлдең бүтән төрлө бер рәүешенә тоҡҡанда әйтелә; башҡаса, бүтәнсә. *Тәҙрәне йәбештергәс, ышыҡ булды, тегеләй ел өрөп торор ине.*

**3.** Янағанда әйтелә. *[Тәңкәбикә — Ишмырҙаға:] Кит, телең ҡороғоро!.. Бынау ҡамсы менән өҙә һыҙырырмын тегеләй.* М. Кәрим.

**4.** *с. мәғ.* Башҡа төрлө. *[Өммиә — Зөбәйҙәгә:] Бәхетең инде, ирҙең тегеләйерәгенә тап булһаң...* Ғ. Әхмәтшин.

♦ **Буш тегеләй** кешенең бер ҡылығын саманан артыҡ күреп асыуланғанда әйтелә. *[Гөлзада — Барыйға:] Мин ул кешеңдең зиманын ҡалҡытырмын, буш тегеләй.* Ш. Насыров.

**ТЕГЕЛӘЙ-БЫЛАЙ** *р.* Тегеләй ҙә былай, төрлө яҡҡа. *Ҡуҙыйкүрпәс .. тегеләй-былай ҡараһа ла, .. бер нәмә белерлек түгел ине.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ТЕГЕН** *и.* **1.** Төрлө кейем тегеү эше. *Теген машинаһы. Теген алыу. Теген менән булышыу.* ■ *Гөләйшә инәй, күҙлеген күтәреп, ҡулындағы тегенен бер минутҡа туҡтат[а].* К. Кинйәбулатова.

**2.** Тегелмәктә булған нәмә. *Теген тегеү.*

**ТЕГЕНДӘ** *р.* **1.** Теге ергә. *Йәнтимер: «Мин тегендә киттем, һин ҡайта тор»,— тине. Уның «тегендә» тигәне детдомға ине.* С. Агиш.

**2.** Теге ерҙә.— *Бәй, Самсон, һин дә бында бит, .. нисек бында килеп эләктең, мин тегендә һине көтәм дә көтәм тағы.* Т. Йәнәби. *Әхмәҙи: — Тегендә ҡоҙалар һурпа көтә, һеҙ ни нәмә эшләп бында буҙлашып ултыраһығыҙ?* Һ. Дәүләтшина. *[Тау батыр:] Бынау ерҙең тауы бик йыш, ә тегендә һирәк булған* (Әкиәттән). / Әллә ҡайҙа ситтә; алыҫта. *Беҙ бөгөн бында, иртәгә тегендә.* Д. Юлтый.

**ТЕГЕНДӘ-БЫНДА** *р.* **1.** Төрлө ергә. *Тегендә-бында барыу.* ■ *Беҙ тегендә-бында һуғылып йөрөгән арала бер нисә быуынға һикереп өлгөргән бойҙай баҫыуҙары инде баш ҡоҫоп ултыра.* К. Мәргән.

**2.** Төрлө ерҙә. *Тегендә-бында һалам эҫкерттәре ҡарайып күренә.* Р. Низамов.

**ТЕГЕНЕҮ** *ҡ.* Тегеү эше менән булышыу; теген тегеү. *Гөләйшә инәй ярты сәғәт самаһы әле ҡул, әле машина менән тегенеп ултырҙы.* К. Кинйәбулатова.

**ТЕГЕНСЕ** *и.* Тегеү менән шөғөлләнгән кеше. *Оҫта тегенсе.* ■ *Ул [Гөлнур] яңы ҡыҙыл күлдәк кейеп, тегенсенән ҡайтып килә ине.* М. Кәрим.

**ТЕГЕҮ**[1] (тек*е*) *ҡ.* **1.** Беселгән тауарҙы сит-ситенән энәле еп менән беркетеп, кейем-ҡаралды әҙерләү. *Аяҡ кейеме тегеү. Итек тегеү. Шаршау тегеү. Тегеү фабрикаһы.* ■ *Француз күлдәк теккәнһең, итәге ергә тейһен, тип* (Халыҡ йырынан). / Бер нәмәнең сит-ситен йәки өлөш-өлөшөн еп, бау үткәреп беркетеү. *Ҡуша тегеү. Яраны тегеү.* ■ *Ҡарһаҡсылар күптән инде аттарын ашатып, эйәрҙәрен ныҡытып, айыл баштарын теген, .. ошо көндәрҙе көтә ине.* Ғ. Дәүләтшин. *Юлия үҙенең аҙаҡҡы папка яҙыуҙарын .. теген, бәйләп, шкафҡа һалды.* Һ. Дәүләтшина.— *Эйе-е,— ти карт һуҙып,— бер нәмә лә белмәйһең икән, төнө буйы һинең эсәктәреңде рәтләнеләр. Эсеңде тектеләр.* С. Агиш. **Өҫтән тегеү** кейемдең һүтек, йыртығын өҫкә кейгән көйө тегеү (өҫтән теккәндә бәхет кәмей, тип ауыҙға еп ҡаптырып тегәләр). **Күҙ тегеү** *шул уҡ* **күҙ текәү** (*ҡар.* **текәү**).

**2.** *иҫк.* Осло нәмә менән тишә төртөү; сәнсеү *Беҙ менән тегеү.*

**3.** *ҡусм.* Туп-тура йүнәлтеү; төбәү. *[Ер-әсә:] Һәр бер быуын аҡылын да, өмөтөн дә миңә теккән.* З. Биишева.

**4.** *диал.* Шаҡарыу. *Текмә тегеү.*

● *Бирәү мал таба, бирәү тоҡсай тегә.* Әйтем

**ТЕГЕҮ** [2] *и. кар.* **теген.**

**ТЕГЕҮЛЕ** *с.* Тегелгән, әҙер. *Тегеүле кейем. Тегеүле кулдәк.*

**ТЕГЕҮСЕ** *и.* Тегеү менән шөғөлләнгән кеше; тегенсе. *Тегеүсе булыу.* ■ *Игенсегә курһәтмә бир нисек иген игергә, тегеүсене өгөтләп тор йөйҙө купшы бөрөргә.* М. Кәрим.

**ТЕГЕШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **тегеү** [1]. *Кейем тегешеү.*

**ТЕГӘЛӘҮ** *к. диал. кар.* **текәлеү** 1, 2.

**ТЕГӘР: тегәр еп** кейем тегә торған йыуан еп.

**ТЕГӘҮ** *к. кар.* **текәү.**

**ТЕҘ** *и. диал. кар.* **тубыҡ** [1].

♦ **Теҙ сүгеү** *кар.* **сүгеү.**

**ТЕҘГЕН** [1] *и.* **1.** Нуҡта, йүгәндең ат башын тота торған бауы. *Теҙген осо. Теҙгендә бәйләү. Теҙгендән алыу. Теҙгендән тотоу.* ■ *Ғәмбәров .. һикереп төштө лә, атын теҙгененән етәклә[п килеп], карт менән күреште.* Ш. Янбаев.

**2.** *күсм.* Буйһондороу, ҡулда тотоу, идара итеү сараһы. *Теҙгенде бушатыу. Теҙгенде ҡыҫҡартыу. Теҙгенде ҡыҫҡа тотоу. Теҙгенгә алыу.* ■ *«Был егет тағы башбаштаҡлыҡ эшләп ташламаһын,— тине Өмөтбай,— теҙгенен тартыбыраҡ тоторға кәрәк».* Б. Хәсән. *Һис тотор хәл юҡ күңелдең теҙгенен.* Ш. Бабич.

**ТЕҘГЕН** [2] *и. диал.* Көрөҫ.

**ТЕҘГЕНЛӘҮ** *к.* **1.** Теҙген [1] (1 мәғ.) тағыу, теҙгенле итеү. *Йүгәнде теҙгенләү.*

**2.** *күсм.* Буйһондороу, ҡулға алыу, йүгәнләү.— *Ҡатыным тупаҫ, нисек теҙгенләргә инде үҙен, тиһеңме? Ниңә теҙгенләйһең уны. Бәлки, үҙеңдә лә гәйеп барҙыр.* Ә. Ниғмәтуллин.

**ТЕҘГЕНҺЕҘ** *с.* **1.** Теҙген тағылмаған. *Теҙгенһеҙ йүгән.*

**2.** *күсм.* Эш, ҡылыҡта сик, саманы юғалтҡан; йүгәнһеҙ. *Теҙгенһеҙ кеше. Теҙгенһеҙ булыу.*

**ТЕҘГЕНҺЕҘЛӘНЕҮ** *к.* Эш, ҡылыҡта сик, саманан сығыу; йүгәнһеҙләнеү. *Ҡайһы саҡта, .. амин тотам, тип, ашарға һорап алам да амин тотмайым да ҡуям. Минең был .. теҙгенһеҙләнеү Анна Константиновна менән Хәйруллинға бик оҡшай.* С. Агиш.

**ТЕҘГЕС** *и.* Тотҡан балыҡты айғолағынан үткәреп теҙә торған асалы сыбыҡ йәки бау. *Ильяс теҙгестәге балыҡтарҙы һыуҙан алып Ғырҙасовка курһәтә.* Ш. Бикҡол.

**ТЕҘҘЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **теҙеү.**

**ТЕҘЕКЛӘНЕҮ** *к. диал. кар.* **теҙелеү** 2. *Аҫ теҙекләнеп күсеп китә.*

**ТЕҘЕКЛӘҮ** *к. диал. кар.* **теҙеү** 2.

**ТЕҘЕЛЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **теҙеү.** *Епкә теҙелгән мәрйен.*

**2.** Бер буй булып урынлашыу. *Сафка теҙелеү. Теҙелеп барыу. Теҙелеп осоу. Теҙелеп тороу. Теҙелеп ултырыу.* ■ *Юл буйлап теҙелгән телефон бағаналары туктауһыҙ геүләй.* Ш. Янбаев. *Ҡаҙ бәпкәкәйҙәре һары икән, теҙелеп-теҙелеп һыуға бара икән* (Халыҡ йырынан).

**ТЕҘЕЛЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **теҙелеү** 2. *Теҙелешеп барыу. Теҙелешеп ултырыу.*

**ТЕҘЕМ** *и.* **1.** Теҙелеп торған бер төрлө нәмәләр йәки кешеләр буйы; теҙмә. *Тауҙар теҙеме.* ■ *Беҙҙең дәүер йылдар теҙемендә ҡояш булып торор юғары.* Б. Бикбай. *Алғы теҙемдә барған дүрт малай йыр башлай. Колонна йырҙы дәррәү күтәреп ала.* З. Биишева.

**2.** *грам.* Күп төрлө эйәрсен һәм ҡушма һөйләмдәрҙән төҙөлөп, бик ҡатмарлы фекерҙе әсенә алған синтаксик конструкция. *Теҙемдәр бынан бер нисә быуат элек ҡобайырҙар менән эпостарҙан үҫеп сыҡҡан; мәғәнә яғынан улар ҡатмарлы уй-фекерҙе аңлатып, бер бөтөн иншаны хәтерләтә.* Ҡ. Әхмәр.

**ТЕҘЕҮ** *к.* **1.** Еп, бауға, шешкә бер-бер артлы үткәреү. *Мәрйен теҙеү.* ■ *Ул [Зыя] шешкә теҙгән балыҡтарын тегеләй ҙә, былай ҙа әйләндереп һанап ҡараны ла, үлән өҫтөнә һалды.* М. Тажи.

**2.** Бер буйға урынлаштырыу. *Теҙеп һалыу. Теҙеп тәңкә баҫыу.* ■ *Усаҡ алдындағы бәләкәй кәштәгә һауыт-һаба теҙеп ҡуйылған.* Б. Бикбай. / Бер рәткә урынлаштырыу. *Теҙеп ултыртыу.* ■ *Беҙҙең батальонды .. сафҡа теҙеп, ҡала ситенә алып сыҡтылар.* Д. Юлтый.

**3.** Бер-бер артлы өҙмәй ялғау (һүҙ, хәбәрҙе). *Теҙеп һөйләү. Теҙеп әйтеү. Теҙеп яҙыу.* ■ *Һүҙҙәрҙе теҙгәндә .. уйламай, тик телгә килгәнде генә теҙә инем.* С. Агиш. *Шуны башлап яҙып киттем, теҙеп киттем, теҙеп.* Ш. Бабич.

**4.** *диал.* Һабаҡлау.

♦ **Бер епкә теҙеү** *кар.* **еп** [1]. **Епкә теҙгән кеүек** *кар.* **еп** [1].

**ТЕҘЕШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **теҙеү.**

**ТЕҘЛӘНЕҮ** *к. диал.* Тубыҡланыу.

**ТЕҘЛӘҮ** *к.* Мөгөҙҙө төҙәп, йүгертеп этеү; һөрләктөрөп, ҡыуып һөҙөү. *Теҙләп алып китеү.* ■ *Үгеҙ инде һирпеп алып, теҙләп ташлайым тигәндә генә Тауҙытауғаһүгар үгеҙҙе ике мөгөҙөнән шаҡарып тотоп алған* (Әкиәттән).

**ТЕҘЛӘШЕҮ** *к.* **1.** *урт. кар.* **теҙләү.**

**2.** *күсм. диал.* Еңешеү.

**ТЕҘМӘ** I *и.* **1.** Теҙелеп торған бер төрлө нәмәләр йәки кешеләр буйы; теҙем. *Кулдәр теҙмәһе. Тауҙар теҙмәһе. // Теҙмә тауҙар.* ■ *Ылауҙар теҙмәһе эргәһенән колонна менән сигенә башланыҡ.* Д. Юлтый.

**2.** Теҙеп яҙылған исемлек. *Исемдәр теҙмәһе. Һүҙҙәр теҙмәһе. Теҙмәгә теркәү.* ■ *Теҙмәһендә данлы батырҙарҙың күрҙем миңә яҡын исемде.* Ғ. Ғүмәр.

**3.** *диал.* Шаҡарма.

II *с.* **1.** *лингв.* Теҙеп теркәүле. *Темә бәйләнеш. Теҙмә ҡушма һөйләм.*

**2.** Шифырға һалыулы. *Теҙмә әҫәр.*

**ТЕҘРӘТЕҮ** *к. диал.* Теҙеү.

**ТЕҘӘКЛӘНЕҮ** *к. иҫк. кар.* **тубыҡланыу.** *[Таңдыса:] Уралына артылып, теҙәкләнеп, тартылып, ергә терәп аяғын, .. ҡулындағы ҡылысын яҡ-яғына һелтәгән.* «Ҡуңыр боға».

**ТЕҘӘКЛӘҮ** *к. диал.* Теҙеү.

**ТЕЗЕЛДӘҮ** *к.* Тез-тез итеү, тез-тез килеү. *Аттар бөгәләктәр тезелдәүенә сыҙай алмайынса төтөнләк һалған урынға һәм кешеләр тирәһенәрәк килде.* Я. Хамматов.

**ТЕЗЕЛДӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **тезелдәү.**

**ТЕ́ЗИС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *лог.* Дөрөҫлөгө иҫбатланырға тейешле төп фекер. *Тезис ҡуйыу. Үҙ тезисыңды яклау.*

**2.** Идеалистик философияла: үҫеш процесының тәүге стадияһы.

**3.** Докладтың, лекцияның һ. б. төп фекерен эсенә алған ҡыҫҡаса яҙма. *Докладтың тезисы.*

**ТЕЗЛӘҮ** *к.* Бәләкәй генә тишектән шәп итеп һиптереү. *Һыйырҙы һауғанда һөтө тезләп аға.*

**ТЕЗ-ТЕЗ** *окш.* Нәҙек кенә яңғырауыҡлы тауышты белдергән һүҙ. *Йоҡа силәккә тез-тез итеп бәрелгән һөт тауышы ишетелә.* Һ. Дәүләтшина.

**ТЕЗӘНЛӘҮ** *к.* Ашығып, ваҡ-ваҡ баҫыу. *Тезәнләп атлау.*

**ТЕИЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Алла бар һәм ул донъяны яратып, уға бер үҙе идара итә, тип раҫлаған дини тәғлимәт.

**ТЕИСТИК** *с.* Теизмға мөнәсәбәтле. *Теистик ҡараш. Теистик хөрәфәт.*

**ТЕЙГЕҘЕҮ** *к. диал.* Тейҙереү.

**ТЕЙҘЕРЕҮ** *к.* **1.** Ныҡ яҡынайтып, ҡағылдырыу. *Иренгә иренде тейҙереү.* ■ *Патефон да үҙ яйына әкрен генә барып туҡтаны. Сәйҙел ҡулын тейҙермәне уға, Зәйнәп тә кәрәкле тапманы.* Ғ. Сәләм. / Нимәгәләр тейергә, йоғонорға мөмкинлек биреү.— *Апай, башығыҙға һыу тейҙермәгеҙ, зерә лә татырлы һыу ул.* М. Тажи.

**2.** Нимәнеңдер шауҡымына, тәьҫиренә дусар иттереү. *Зыян тейҙереү. Балаға тымау тейҙереү. Башҡа еҫ тейҙереү.* ■ *Шамун ағай дүртенсе тәүлек инде, өйөндә .. ыҙаланып ята. Һалҡын тейҙергәндер күрәһең. Тәне ҡыҙыу, йүтәлләй.* Д. Исламов.

**3.** Килтереп ҡағылдырыу. *Күҙгә сыбыҡ осон тейҙереү.* ■ *Урмандарға барҙым, утын ҡырҡтым, тейҙермәнем уның тамырына* (Халыҡ йырынан).

**4.** Атҡанда, бәргәндә тура килтереп һуғылдырыу. *Бер генә уҡсы ла ҡошҡа атып тейҙерә алмаған* (Әкиәттән).

**5.** Ҡағылдырып эҙ ҡалдырыу. *Кейемгә бысраҡ тейҙереү.*

**6.** Кемдеңдер ҡулына эләктереү. *Өлөш тейҙереү.*

◆ **Ҡул тейҙереү** 1) һуғыу. *Балаға ҡул тейҙереү;* 2) урлау. *Ҡылысбайҙың .. кеше малына ҡул тейҙермәгәнен белгән кешеләр ҙә бар ине.* Ш. Шәһәр.

**ТЕЙЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **тейеү** 1. *Был ҡулдәккә тейелмәгән алыҫ ата-баба ҡулы. Иреңә биш йәш тулғанда тик мин иләп, һуҡтым уны.* Н. Нәжми.

**ТЕЙЕЛМӘҪЛЕК** *и.* Кемдең дә булһа ҡул һуҙыуына, хәсләнеуына ҡаршы закон тарафынан һаҡланыу хәле. *Дипломатик тейелмәҫлек.* ■ *БАССР граждандарына шәхестең тейелмәҫлеге гарантиялана.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ТЕЙЕН** *и.* **1.** Кимереүселәр төркөмөнә ҡараған, ағас ҡыуышына оялай торған өлтөк ҡойроҡло бәләкәй генә йәнлек. *Тейен бер ялбыр ылыҫҡа һикереп ултырҙы ла, ҡойроғон тегеләй ҙә, былай ҙа һелкkеләп, һыртына һалды.* М. Тажи. **Осар тейен** алғы һәм артҡы аяҡтары араһындағы яҫы ярыны йәйеп, осоп ҡуна торған үҙенә бер төрлө кимереүсе йәнлек.

**2.** Шул йәнлектең тиреһе. / *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Тейен бүрек. Тейен тун.*

◆ **Сәркәш тейен** *кар.* **әлгәнйәк.**

**ТЕЙЕНДЕРЕҮ** *к.* Нимәгәлер ҡул йәки ауыҙ тейҙереп, кинәндереү. *Малды үләнгә тейендереү.*

**ТЕЙЕНЕҮ** *к.* Юҡ ерҙән нимәгәлер эйә булыу, эйә булып кинәнеү. *Аҡсаға тейенеү. Кейемгә тейенеү.* ■ *Ул [Мулдаҡай] .. ир уртаһына еткән сағында ғына яңғыҙ атҡа тейенгән.* Б. Бикбай. *Иген үҫтерәбеҙ, үҙебеҙ икмәккә тейенә алмайбыҙ.* Р. Низамов.

**ТЕЙЕҮ** *к.* **1.** Ныҡ яҡынайып, ҡағылыу. *Теш тешкә теймәй.* ■ *Тауҙарым бейек, торалар күкһел болотҡа тейеп.* М. Хәй. / Ҡағылып, ниҙер ҡылыу. *Кеше ҡулы теймәгән ер.* ■ *Шафиҡтың тауышы үҙгәрҙе. Күптән бәке теймәгән һаҡал-мыйығы тырпайҙы.* Я. Хамматов.

**2.** Тәьҫир итеп, ниндәйҙер шауҡым, йоғонто биреү. *Ауырлыҡ тейеү. Зыян тейеү. Файҙа тейеү. Һыуыҡ тейеү. Тымау тейеү. Эҫе тейеү.* ■ *[Булат:] Әллә кистән башҡа еҫ тейгән — күңел болғана.* К. Кинйәбулатова. / Тәьҫир итеп, зыян яһау. *Күңелгә тейеү. Эскә тейеү.* ■ *Ул [һыу] ауыҙға алғыһыҙ һыуыҡ — тешкә тейә.* Р. Низамов.

**3.** Килеп һуғылыу. *Сыбыҡ осо тейә.* ■ *— Күҙгә бер нәмә тейһә, уны өс тапҡыр тешләп төкөрәләр* (Ырымдан). / Йәберләү, рәнйетеү. *Балаға тейеү.* / Ниндәйҙер хисте, тойғоно ҡуҙғатыу. *Асыуға тейеү. Зитҡа тейеү. Маҙаға тейеү. Намыҫҡа тейеү. Теңкәгә тейеү.* ■ *Эй, шул ҡатын-ҡыҙҙың автобуста сумка менән йөрөүҙәре йәнемә тейәләр.* Р. Солтангәрәев.

**4.** Атҡанда, бәргәндә тура килеп, һығылыу. *Таш тейә. Уҡ тейә.* ■ *Әйҙә, тинем, пуля миңә тейһен, тик теймәһен пуля Ватанға.* Ғ. Сәләм.

**5.** Килеп ҡағылып, эҙ ҡалдырыу. *Бысраҡ тейә. Тап тейә.*

**6.** Юл ыңғайында ҡайҙалыр инеү; һуғылыу. *Беҙ башҡорт халҡының мәшһүр шағиры Аҡмулланың ауылы Туҡһанбайға ла тейеп үттек.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 6 октябрь.

**7.** Ҡулға эләгеү. *Тейгән өлөш.* ■ *Ҡара биҙәкле йөҙөк Зәлифәгә тейҙе.* Һ. Дәүләтшина. / Берәй эштән буш булып, уңай килеү. *Ваҡыт тейеү. Форсат тейеү.* ■ *[Илмырҙа:] Мин ҡул тейгәндә бына шулай һаман да эшләштерәм.* Ә. Вәли.

**8.** Үҙеңә алыу; ороноу. *Кеше нәмәһенә тейеү.*

**9.** Тейешле булыу (туғанлыҡ мөнәсәбәтенә ҡарата). *[Ныяҙгол:] Алыҫыраҡ булһа ла ул миңә ағай-эне тейә* Һ. Дәүләтшина.

**10.** Сифат ҡылымдың *-р* формаһында ниҙеңдер тейешле икәнен белдерә. *Кооператив Аҡназарҙың алам тигән нәмәләрен арзан хаҡ менән бирҙе лә ҡалғанына тейерен аҡсалата тулы боло менән биреп ебәрҙе.* Ғ. Дәүләтшин.

◆ **Тейеүенән шартлауы яман** *кар.* **шартлау.**

● *Йәтим ауыҙы ашҡа тейһә, танауы ҡанар.* Әйтем. *Ташҡа талау теймәҫ.* Мәҡәл. *Тейһә — тейенгә, теймәһә — ботаҡҡа.* Мәҡәл. *Теймәҫте хоҙай һөймәҫ.* Мәҡәл. *Үҙеңә теймәгән йылан йөҙ йыл йәшәһен.* Әйтем. *Яҡшы кешенең яҡ-*

*шылыгы тейер тар ерҙә, яман кешенең ямանлыгы тейер һәр ерҙә.* Әйтем.

**ТЕЙЕШ**[1] *мөн.* **1.** Мотлаҡлыҡ, мәжбүрилек мәғәнәһе бирә. *Тейеш табыу. Тейеш түгел.* ■ *Иген өләшеү бик ашығыс үтергә тейеш.* Һ. Дәүләтшина. *Санитар әйтеүе буйынса мин шунда барырға тейешмен.* Д. Юлтый.

**2.** Ныҡлы ышанысты белдерә. *Беҙ еңәбеҙ, беҙ еңергә тейешбеҙ.* Х. Ҡунаҡбай. *Кеше боҙоҡ икән, ул һис шикһеҙ эсергә лә тейеш, тиһең һин.* Ғ. Сәләм.

**3.** Ышаныслы, ныҡлы фаразды белдерә. *Ишек баяғыса тыштан бикле тора. Тимәк уларҙың башҡа юлы булырға тейеш.* Б. Бикбай. *Минең уйымса, бында йыйылыш кеүек матур гәҙәттәр булмаҫҡа тейеш ине.* С. Агиш.

**ТЕЙЕШ**[2] *с.* **1.** Туранан-тура ҡағылышлы. *Тейеш эш.* ■ *[Рәшиҙә:] Әбей, һин тейеш булмаған ергә тығылма, үҙ эшеңде бел.* М. Тажи.

**2.** *кар.* **тейешле** 2. *[Көтөүсе:] Мин, бай ағай, үҙемә тейеш эш хаҡын һорарға килдем* (Әкиәттән).

**ТЕЙЕШЕНСӘ** *р.* Тейеш булғанса, талап ителгән тиклем; кәрәгенсә. *Тейешенсә һөйләү. Тейешенсә эшләү.*

**ТЕЙЕШЕҮ** *ҡ.* Эшкә һ. б. ихласлап, ныҡлап тотоноу; керешеү. *Ашҡа тейешеү. Һуҙғә тейешеү.*

**ТЕЙЕШЛЕ** *с.* **1.** Билдәле бер эш-хәрәкәт өсөн махсус билдәләнгән, шуға бәйләнешле йәки шуны башҡарыуға мөмкинлек бирә торған; кәрәкле. *Тейешле ваҡыт. Тейешле шарт. Хәл итергә тейешлә мәсьәлә.* ■ *Сөнәгәт .. Мәүлет байҙың килгәнен белдереү өсөн тейешле кешеләргә сығып китте.* Ғ. Дәүләтшин. *Приют эвакуацияға әҙерләнә, шул сәбәпле [тәрбиәләнеүсе ҡыҙҙар хатта] адрестарын күрһәтмәйҙәр һәм яуап яҙыуҙы ла тейешле тапмайҙар.* Д. Юлтый.

**2.** Түләргә, бирергә һ. б. алдан тәғәйенләнгән, билдәләнгән. *Тейешле аҡса.* ■ *[Тимер:] Бар, бар, иртәгә үк хөкүмәткә тейешле игенеңде илтеп тапшыр!* Б. Бикбай. *[Ғәйни:] Был көлтәне алып ҡайтышһам, теге мин һеҙгә бирергә тейешле булған бер арба көлтәнән ҡотолам икән.* Т. Йәнәби.

**3.** Ниндәйҙер мөнәсәбәттә булған (туғанлыҡҡа һ. б. төрлө бәйләнештәргә ҡарата). *Апай тейешле кеше.* ■ *Хәмәт уға [Сакайға] бажа тейешле кеше бит.* Б. Бикбай. — *Һиңә кәләш булырға тейешле ҡыҙ Күсәр хан ҡыҙы Маянһылыу ине.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ТЕЙЕШЛЕК** *и.* Тейеш булғанлыҡ; кәрәклек. *Былдай һорауҙарға мин яуап бирә алмайым. Ысынлап та мин үҙемдең кем булырға тейешлегем тураһында бер нәмә лә уйламайым шикелле.* С. Агиш.

**ТЕЙЕШҺЕҘ** *с.* Маҡсатҡа ярашһыҙ; кәрәкһеҙ. *Тейешһеҙ нәмә. Тейешһеҙ эш.*

**ТЕЙМӘ: теймә бер** һәр бер, һәр төрлө; теләһә ниндәй. *Теймә бер кеше.* ■ *Массажды врач кушыуынан тыш теймә бер ауырыуға ҡулланырға ярамай.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 7 ғинуар.

**ТЕЙӘГЕС** *и.* Ниҙе лә булһа тейәй торған машина. *Сүмесле тейәгес. Һәнәкле тейәгес. Сөгөлдөрҙө автомашинаға тейәгес менән тейәү.* ■ *Розалия тейәгестән аҡҡан игенде кузовка таратты.* Р. Низамов. *Тейәгестең үткер тешле барабаны силос массаһын бер метр киңлектә умырып ала бара, транспортёр аша арбаға ҡоя тора.* Ә. Гәрәев.

**ТЕЙӘК** *и.* **1.** Ниҙер элеү, эләктереү өсөн уртаһынан бау таҡҡан ҡыҫҡа таяҡ. *Ит тейәге. Көрөҫ тейәге.* ■ *Баһау моҙғаны тейәгенән бер ботаҡҡа элде.* Ж. Кейекбаев. *Түбәлектең уртаһына тейәк менән аҫып, Сабирйән ҡарт кәзә тәкәһе тунай.* Н. Мусин. / Мисәүҙәге аттың ике мисәү осон элә торған таяҡ.

**2.** Уртанан еп тағып, ике башын ослап, балыҡ емләп, эре балыҡҡа һала торған 2-3 см. оҙонлоҡтағы нәҙек ағас. *Тейәк емләү. Тейәк һалыу.*

♦ **Ауыҙлыҡ тейәге** ауыҙлыҡты дүңгәләккә элә торған саталы тимер.

**ТЕЙӘЛЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. кар.* **тейәү** 1. *Тейәлгән иген.*

**2.** Транспорт сараһына күмәкләп ултырыу. *Кәмәгә тейәлеү. Машинаға тейәлеү.* ■ *Йәштәр .. саналарға тейәлеп, урам буйына ат йөрөтөргә китте.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТЕЙӘЛЕШЕҮ** *ҡ. урт. кар.* **тейәлеү** 2. *Машинаға тейәлешеп китеү.*

**ТЕЙӘН** *р. диал.* һәр ваҡыт, гел. *Сәсте тейән кер һабыны менән йыуһаң, ҡауаҡлап китә.*

**ТЕЙӘНЕҮ** *ҡ.* Кәрәк-ярағты күп итеп тейәү. *Тейәнеп юлға сығыу.*

**ТЕЙӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. кар.* **тейәү** 1.

**ТЕЙӘҮ** *ҡ.* **1.** Алып китеү өсөн транспорт сараһына күп итеп урынлаштырыу. *Арбаға утын тейәү. Ауыр итеп тейәү. Машинаға ашлыҡ тейәү. Вагонға күмер тейәү.* ■ *Улар [Ташбатҡан халҡы] тәгәрмәс туғыны, һалабаш, дегет кеүек үтемле нәмәләр тейәп, ҡалаға бара.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Алып китеү өсөн күп итеп урынлаштырыу (транспорт сараһына ҡарата). *Пожарныйҙарҙы тейәгән ҡыҙыл автомобилдәр саба.* Ғ. Дәүләтшин. *Автобустар ҡыҙ һәм егеттәрҙе тейәгән, баҫыуҙарға бара.* Ғ. Сәләм.

**3.** *күсм.* Күп итеп мәғлүмәт туплау. *Яңы хәбәр тейәп ҡайтыу.* ■ *Хәҙер [фронтҡа] тәүҙә оҙатылған кеүек пушка ите булып түгел, бәлки аҫыҡ фекер, сыныҡҡан көрәш тәжрибәһе тейәп бара инек.* Д. Юлтый.

**ТЕЙӘШЕҮ** *ҡ. урт. ярҙамл. кар.* **тейәү** 1. *Вагон тейәшеү. Йөк тейәшеү.*

**ТЕК**[1] *окш.* Ҡаты бәләкәй нәмә ҡатыға ҡапыл тейгәндә һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Тек итеү.* ■ *Ғәйзулла бабайҙың һалдауы тек итеп кенә ҡала.* Н. Мусин.

**ТЕК**[2]: **тек баҫыу** кәүҙәне төп-төҙ ҡатырып баҫыу; дең баҫыу. *Тек баҫып тороу.*

**ТЕКЕЛДӘТЕҮ** *ҡ.* Тек-тек иттереү, тек-тек килтереү. *Текелдәтеп һуғыу.*

**ТЕКЕЛДӘҮ** *ҡ.* Тек-тек итеү, тек-тек килеү. *Стеналағы сәғәттең ялҡау ғына текелдәп йөрөгәне ишетелә.* С. Агиш.

**ТЕКЕМЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Ныҡ иғтибарлау; ентекләү. *Текемләп тикшереү. Текемләп һорау.* ■ *[Дейеү] ҡыҙҙың бармаҡтарын текемләп ҡараны .., йөй күренмәне, ти* (Әкиәттән).

**2.** Ғәйеп табып, өҙләкһеҙ мыжыу; өҙләкһеҙ нығып, төрткөләү. *Баланы ла юкка-барға күп әрләй, күп игәй торғас, алдашырға өйрәтеп була.. Колхоз председателдәренең кайһы берҙәре лә ошо бала шикелле булып китә. Текемләп, өйрәтеп, өҙгөләп-йолкколап тороуға күнеп, үҙ башын бөтөнләй юғалтып ташлай.* З. Биишева.

**ТЕКЕРЛӘТЕҮ** *к.* Текер-текер иттереү, текер-текер килтереү.

**ТЕКЕРЛӘҮ** *к.* Текер-текер итеү, текер-текер килеү.

**ТЕКЕР-ТЕКЕР** *окш.* Тигеҙһеҙ каты нәмәлә икенсе бер каты нәмәне йөрөткәндә һ. б. сыккан тауышты белдергән һүҙ. *Текер-текер итеү. Текер-текер килеү.*

**ТЕКЕС** *с. диал.* Текә. *Ай күпме йәки текес булып тыуһа, шул ай бөткәнсә яуын булыр* (Һынамыштан).

**ТЕКЛӘНЕҮ** *к.* Теклəп карау. *Тегеләр бәзрәйешеп, бер-береһенә текләнде.* Т. Килмөхәмәтов.

**ТЕКЛӘҮ** *к.* Күҙ-карашты туп-тура йүнәлтеү, туп-тура төбәү. *Текләп карау.* ■ *Емеш баҙырлап яткан эре күҙҙәргә текләп, оҙак-оҙак уйланып торҙо.* З. Биишева.

**ТЕКЛӘШЕҮ** *к.* Бер-береңә текләү. *Текләшеп ултырыу.*

**ТЕКМӘ** *и.* **1.** Нәҙек ағасты өс буй кәртәгә шакарып яһаған койма; шакарма. *Текмә тегеү. Текмә тотоу.*

**2.** Йыуан ағасты теҙеп ултыртып яһаған койма. *Батыр үҙе лә йортон имән текмә менән уратып алды.* Ғ. Ибраһимов.

**ТЕКРӘНЛӘҮ** *к. диал.* Тәкәбберләнеү.

**ТЕКСТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Билдәле бер бәйләнештә, эҙмә-эҙлекле итеп яҙылған, баҫып сығарылған, йәки хәтергә һеңгәндәрҙе тәшкил иткән һүҙҙәр, һөйләмдәр. *Боронго комарткы тексы. Пьесаның тексы. Әкиәт тексы.* ■ *Яҙып алынған тексты һөйләүсегә укып, кәмселектәрен төҙәтергә кәрәк.* Ғ. Амантай. / Эҫәрҙең укыу-укытыу өсөн тәғәйенләнгән өҙөгө. *Сит телдәге тексты тәржемә итеү.* ■ *«Кояш һәм йәйгор» тексын укыгас, ул [укытыусы] балаларга класта йәйгор күрһәтә.* «Башкортостан укытыусыһы» 1965, № 4.

**2.** Музыка әҫәренең һүҙҙәре. *Йыр тексы.*

**3.** *типогр.* Иң эре шрифттарҙың береһенең размер исеме.

**ТЕКСТО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Текстология өлкәһендәге белгес.

**ТЕКСТОЛОГИК** *с.* Текстологияға мөнәсәбәтле. *Текстологик тикшеренеү.*

**ТЕКСТОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Филологияның әҙәби һәм тарихи текстарҙы өйрәнә торған, ғилми баҫмаға әҙерләй торған бүлеге.

**ТЕКСӘЙЕҮ** *к.* Күҙ алмай, нык итеп текләү. *Тексәйеп карау. Тексәйеп катыу. Тексәйеп ултырыу.* ■ *[Старшина:] Мин йәш кәләш куйынына китәм. Йә, ниңә тексәйеп калдығыҙ? Әллә кайһылай шатланырға икәнде онотторҙомо?* Б. Бикбай. *Кәкре башлы таяғына таянған килеш, ауыҙын аса биреп, үҙенә тексәйгән картка егет иңбашы ашарак яуап кайтара торҙо.* А. Ғирфанов.

**ТЕКСӘЙЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **тексәйеү.** *Тексәйешеп ултырыу.* ■ *[Әминә:] Нисек булһа ла үтеп бара инде, Сабирйән ағай, ғүмер. Нисәмә йыл күрше йәшәнек, бер-беребеҙгә ауыр һүҙ әйтешеп, тексәйешеп йөрөмәнек.* Н. Мусин.

**ТЕКСӘЙТЕҮ** [1] *к.* Оҙак итеп төбәү (күҙҙе). *Күҙҙе тексәйтеп карау.* ■ *Шаһи карт, урынынан калкынып, күҙҙәрен барса көсөнә тексәйтеп, .. урамға караны.* А. Ғирфанов.

**ТЕКСӘЙТЕҮ** [2] *к.* Текә итеү. *Тимербулат маңлайын тексәйтеп, каштарын йыйырып .. карап торҙо.* Һ. Дәүләтшина.

**ТЕК-ТЕК** *окш.* Кабат-кабат тек иткән тауышты белдергән һүҙ. *Тек-тек итеү. Тек-тек килеү.* ■ *Тәпәш кенә билән итәгенән тек-тек баҫып килә бер болан.* А. Игебаев.

**ТЕКТЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **тегеү** [1] 1, 2. *Салбар тектереп кейеү.* ■ *Ак куянкайҙарҙан тун тектерҙем, тышкынайын ниҙән тышлайым* (Халык йырынан).

**ТЕКТОНИК** *с. геол.* Ер кабығының куҙғалыш һәм үҙгәрешенә мөнәсәбәтле. *Тектоник кыҫымдар аркаһында балсыкташ сланецка, комташ кварцитка, эзбизташ мәрмәргә, таш күмер антрацитка әйләнә.* Д. Буракаев.

**ТЕКТО́НИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ер кабығының куҙғалыш һәм үҙгәрешен, шул һөҙөмтәлә барлыкка килгән үҙенсәлектәрен өйрәнә торған геология тармағы.

**ТЕКӘ** *с.* **1.** Киҫкен үргә күтәрелгән; киреһе һөҙәк. *Текә баҫкыс. Текә кая. Текә яр. Текә юл. // Текә төшөү. // Текәгә менеү.* ■ *Кояш кат-кат урмандар, текә тауҙар артына төшөп юғалды.* М. Тажи. *Зарланманым һуҙмак текә сактарҙа, текә һукмак була таулы яктарҙа.* С. Ғәбиҙуллин.

**2.** Киҫә күтәрелгән, бейек булған. *Текә маңлай. Текә тояк.* ■ *Ул [Гөләйшә] яулык ябынмаған, сәсен артка һалып тараған, .. маңлайы киң, текә.* К. Кинйәбулатова. *[Ат] алтынға алыштырғыһыҙ булған: каты тояклы, шырт текә яллы, бөркөт күкрәкле .. бер арғымак икән* (Әкиәттән).

**3.** Тураға баҫып тырпайып торған (ял, сәс һ. б. карата). *Текә ял. // Койрокто текә сәнсеү.* ■ *Өлкән кәүҙәле, киң яурынлы, текә кара сәсле, ялпағырак йөҙлө идара ағзаһы Ғәлләм бүрәнәнән торҙо.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** *күсм.* Кырыҫ, тәкәббер. *Текә кеше. // Текә каланыу.* ■ *Емеш көлмәне, .. текә карап тора бирҙе.* З. Биишева.

**5.** *р. мәғ.* Кәүҙәне тура тотоп, эйелмәй. *Сафтағы кеүек текә генә атлап, урамға сыктык.* Д. Юлтый.

♦ **Текә һүҙ** мин-минлек менән уйламайырак әйтелгән һүҙ.

**ТЕКӘЛЕК** *и.* Текә урын. *Текәлеккә килеп етеү.*

**ТЕКӘЛЕҮ** *к.* **1.** Туп-тура йүнәлеү (күҙгә карата); төбәлеү. *Сәхнә тулы артист.. Бөтәһенең дә күҙе миңә текәлгән.* Ғ. Минһажев. *Беҙ һөйләшмәйбеҙ. Беҙҙең күҙҙәр кыҙыл ут диңгеҙенә текәлгән.* Д. Юлтый.

**2.** Күҙ, карашты туп-тура йүнәлтеү. *Текәлеп карау.* ■ *Егеттең матур, асык йөҙө кыҙҙар-*

*га бик оҡшаны булһа кәрәк, өсөһө лә .. уға текәлде.* Д. Исламов. *Ҡыҙ кабат өндәшмәне. Бер нөктәгә текәлеп, мөйөштә ултырып алған да [машинала] килә бирә.* Р. Солтангәрәев.

**3.** *кар.* **төкәлеү.**

**ТЕКӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Текә (1 мәғ.) булыу, текәгә әйләнеү. *Тау менгән һайын текәләнде.* Р. Солтангәрәев. *Әлтәф карттың йорто .. кул ситендә генә. Баҡсаһы ҡулдың текәләнеп кенә төшкән ярына килеп тоташа.* Ғ. Хәйри.

**ТЕКӘНЛӘҮ** *ҡ.* Текә-мекә атлау. *Мәғфүрә Ғәзимәнең .. һүҙ ҙә ҡушмай, текәнләп киткәненә арттан иплэп кенә күҙ һалды.* Һ. Дәүләтшина.

**ТЕКӘС** *с. диал. кар.* **текә 1.** *Текәс тау.*

**ТЕКӘСЛӘНЕҮ** *ҡ. диал.* Текәләнеү. *Инде хәҙер ярҙар текәсләнә төшә: ике-дүрт метрҙан ашкылай.* Х. Зарипов.

**ТЕКӘСТӘН** *р. диал.* Аяҡ үрә, аяҡ өҫтө. *Текәстән ашау.*

**ТЕКӘТЕҮ** *ҡ.* Туп-тура йүнәлтәү (күҙ, ҡараштьы). *Уйсан күҙле, көләс йөҙлө Зәйнәп .. күҙ текәткән үҙенә барып да.* Ҡ. Даян.

**ТЕКӘҮ** *ҡ.* Туп-тура йүнәлтеү (күҙ, ҡараш-ты); төбәү. *Ҡалҡыугараҡ менеп, ҡаулап яланына, ваҡ сауҡалыҡҡа күҙ текәнем. Ҡараһам, .. үҙәктән ете бүре ҡола яланға сыҡты.* С. Кулибай. *Ҡыҙ зәңгәр күҙҙәрен .. күккә текәгән.* Н. Мусин.

**ТЕКӘҮЕР** *и. диал. кар.* **тибенге 1.**

**ТЕКӘШЕҮ** *ҡ. урт. кар.* **текәү.** *Күҙ текәшеү.*

**ТЕЛ** *и.* **1.** *анат.* Умыртҡалы йән эйәләренең һәм кешенең ауыҙы эсендәге мускул үҫендеһе рәүешендә булып, аҙыҡ сәйнәүгә, йотоуға булышлыҡ итә һәм уның тәмен билдәләй торған хәрәкәтсән ойонса ағза. *Керешле тел. Телде сығарыу. Тел күберсеү. Тел осоноу.* ■ *Ауыҙ эсендә тел йөрөй, тел осонда һүҙ йөрөй.* Салауат Юлаев.— *Ай-бай был йәштәрҙе...*— *Ул [ҡатын] телен сартлатып, башын сайҡап ҡуйҙы.* Р. Солтангәрәев. **Бәләкәй** (*йәки* **кесе**) **тел** тамаҡ төбөндәге тын юлын ҡаплай торған бәләкәй үҫенде рәүешендәге ағза. / Ҡайһы бер хайуандарҙың ашамлыҡ итеп файҙалана торған шул ағзаһы. *Тел бешереү. Һыйыр теле ашау.* / *күсм.* Төрлө нәмәнең оҙонса булып сыҡҡан өлөшө. *Шәл ситенең теле. Ялҡын теле.* ■ *Шәмдең алтын ҡалаҡ кеүек ут теле тыныс ҡына яна.* Ә. Вәли. *Яҙҙың беренсе билдәләре, өй түбәләренән боҙлауыҡ телдәре һуҙыла башлағанда, офицерҙар араһында быуа-быуа фронтҡа китергә тейешбеҙ, тигән хәбәр китте.* Д. Исламов.

**2.** Кешелә телмәр өндәре барлыҡҡа килтереүҙә һәм шул йәһәттән фекерҙе һүҙҙәр аша биреүҙә ҡатнашҡан шул ағзаһы; телмәр ағзаһы. *Ҙур тәҙрәнең рәшәткәһен ҡуя алмағанда Йәләлетдин: — Ул еренән түгел, был ҡырынан тотогоҙ, ахмаҡтар! — тип тел менән ярҙам итте.* С. Агиш. *Телен ҡырҡып һүҙһеҙ итер бар сәсәнде,— шул дошманды ҡырмайынса ҡайтма, улым.* Р. Ниғмәти. *Шулай тимәк булып бара Сәйҙел, һүҙҙәр килмәй һаман теленә, табылған һүҙҙәр ҙә төшөп ҡала ҡалтыраныып барған ирендән.* Ғ. Сәләм. **Татлы тел** йомшаҡ, яғымлы тел. **Тел аҫҡысы** һүҙ һөйләү һәләте. *Мин йырлайым һине үҙ телемдә — тел аҫҡысы бирҙең, әсәйем.* Р. Ғарипов. **Тел асылыу 1)** һөйләшә белмәгән ерҙән һөйләшә башлау. *Быуа бит, Айһылыуҙың теле асыла башлар. Тәүҙән уҡ дөрөҫ өйрәтергә кәрәк.* Ғ. Ибраһимов; 2) һүҙгә ихласланыу. *Ат турaһында һүҙ сыҡтымы, Дәүли нисектер яҡтырып, дәртләнеп китә, теле асылып, ихласланып һөйләргә керешә.* Ғ. Хөсәйенов. **Тел асыу** башлап һөйләшеү. *Ерҙә халыҡ йәшәй икән — теле лә йәшәй— Телен аҫҡанда һәр бала әйтәсәк «әсәй»!* Б. Бикбай. **Тел бәйләнеү** һүҙ һөйләй алмаҫ булыу (аптырау, оялыу, ҡурҡыуҙан һ. б.). *[Ҡарлуғас:] Күп уйлауҙан иҫем, аҡылым бөттө, һүҙ әйтергә телем бәйләнде.* Б. Бикбай. **Телгә алыу** кемде йәки ниҙелер һөйләү. *Маҡтап телгә алыу. Һағынып телгә алыу.* Телгә килеү һөйләшмәгән ерҙән һөйләшә башлау. **Телгә килешеү** һүҙ әйтешеү, ерләшеү. **Телгә һалышыу** юҡ-барҙы күп һөйләү. **Тел сиселеү** асылып китеп, һөйләр булыу. **Телде тыйыу** әйтерҙе әйтмәҫ булыу. **Телдән ҡалыу** һөйләшмәҫ булыу, һөйләшә алмаҫ булыу. *Ильяс .. нимә тип әйтергә лә белмәй, телдән ҡалды.* Ғ. Ибраһимов. **Телдән табыу** тейешле-тейешһеҙгә һөйләнеп, зыян күреү. **Телдән төшөрмәү** әленән әле телгә алыу. *Телдән төшөрмәй һөйләү.* **Телдән яҙыу** *кар.* **телдән ҡалыу.** **Телен ҡыҫҡартыу** теләһә ни һөйләүҙән туҡтатыу. **Телең ҡалмаҫ** (*йәки* **ҡалыр инеме**) бер һүҙҙе әйтергә өндәгәндә йәки әйтмәгән өсөн һуҡранғанда әйтелә. **Тел етмәү** еренә еткереп, кәрәгенсә һөйләй алмау. **Теле телгә йоҡмай** сатырлап һөйләй; һүҙгә сая, оҫта. *Тирмәнсе Михайла беҙҙеңсә бик оҫта һөйләй, теле телгә йоҡмай ҡафырҙың.* Б. Ишемғол. **Тел көрмәлеү** әйтер һүҙҙе тейешенсә әйтә алмай тотлоғоу. **Тел ҡүтәреү** ҡаршы һүҙ әйтеү, телләшеү. **Тел ҡағыу** ауыр һүҙ әйтеү. *[Колхозсы — бригадирға:] Тел ҡаға күрмә Биктимергә. Етер!* Б. Ишемғол. **Тел ҡайрашыу** әйтешеү, ирәгәләшеү. *[Фариза:] Ҡуй, ташлайыҡ шул тел ҡайрашыуҙы. Берлектә — тереклек, ти.* Р. Низамов. **Тел ҡыҫыу** ниҙер әйтергә түҙемһеҙләнеү. *Малайҙың әсәһенә ниҙер әйтергә теле ҡыҫып тора төҫлө.* Ф. Иҫәнғолов. **Тел менән тирмән тартыу** ҡулдан килмәҫте һөйләү. **Тел оҙонайыу** батырланып, кәрәк-кәрәкмәгәнде һөйләй башлау. **Тел осонда ғына тороу** бик билдәле нәмә, һүҙ булып та әйтәм тигәндә генә онотоп тороу. *Тағы ни генә нәмә бар ине һуң әле? Тел осомда ғына тора ла.* Ғ. Дәүләтшин. **Тел сарлау** юҡ-бар һүҙ һөйләшеү. *[Рахман:] Һеҙ, ҡыҙҙар, бында эшләргә килдегеҙме, әллә тел сарларғамы?* Ә. Вәли. **Тел сиселеү** асылып, һөйләр булыу; һөйләй башлау. *Айсыуаҡ ләм-мим өндәшмәй килә ине, ҡапыл теле сиселде.* Ш. Янбаев. **Тел сығыу** һөйләй башлау (балаға ҡарата). *Теле сыҡҡан һәр берәһе «Әлифба» һорай.* К. Кинйәбулатова. **Тел сәйнәү** юҡ-бар һөйләү. *[Нәгим:] Йә, тел сәйнәмә, сығар папиросыңды.* И. Насыри. **Тел тейҙереү** кемгәләр насар һүҙ менән ҡағылыу. *[Боҫтан:] Ах, оятһыҙ, һин минең атама тел тейҙермәксе итәһеңме?* Б. Бикбай. **Тел төбө** һүҙҙең йәшерен мәғәнәһе. *Шешә кешенең йәнен көйҙө-*

рә, шырмый күңелдә күтәрә. Улар тел төбө менән бер хикмәт сығарып һөйләй. Ә. Вахитов. **Тел әйләнеү** ниҙер әйтергә баҙнат итеү. *Ғимайға .. кырҡа яуап биргеһе килде Хәтирәнең, тик теле әйләнмәне.* Ф. Исәнғолов. **Тел яғыу** *кар.* **тел тейҙереү. Тел яҙыу** ауыҙҙан һүҙ сығарыу. *Хәмиткә ата-әсәһе: «Һеңлеңде кайҙа калдырҙың?» — тип .. караһа ла Хәмит тел яҙманы.* И. Ниғмәтуллин. **Тел ярҙамы** кемделер яклау йәки кәңәш биреү йәһәтенән әйтелгән һүҙ. *Тел ярҙамы күрһәтеү.* **Уртаҡ тел табыу** үҙ-ара аңлашыу, килешеү.

**3.** Фекер йөрөтөп, үҙ-ара аралашыу хеҙмәтен үтәгән өндәр һәм лексик-грамматик саралар системаһы. *Башкорт теле. Төрки телдәр. Тел өндәре.* ■ *Ул [Истебай] .. үҙ телен, казаксаны ғына белә. Уға Айбулат менән башкортса һөйләшеү мөмкин булһа ла, руссаһы бик тоҡор сыға.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Үҙенә хас билгеләре булған телмәр төрө. *Газета теле. Ғилми тел. Рәсми тел. Сәхнә теле. Һөйләү теле. Әҙәби тел.* / Айырым кешегә хас булған һөйләү ысулы. *Миңлегәле телмәр һөйләне, теле бай түгел ине. Шулай ҙа уны йотлоғоп тыңланылар.* Ә. Ихсан.

**5.** Уй-тойғоно белдереп, аралашыуға мөмкинлек биргән сара. *Музыка теле. Математика теле.* ■ *Ҡурай теле нәҙек илау менән тапкырына сакыра тарихты.* Ғ. Хәйри.

**6.** Һорау алып, кәрәкле мәғлүмәттәр белә торған һуғыш әсире. *Комиссар менән Сорокин тотоп килтергән телдәрҙе блиндажға алып инделәр... Подполковник уларҙан һорау ала башланы.* Б. Дим.

**7.** Төрлө нәмәлә, механизмда, музыкаль ҡоралда бер осо беркетелгән хәрәкәтсән пластинка, стержень. *Барометр теле. Ботинка теле. Гармун теле. Йоҙаҡ теле. Компас теле. Ҡумыҙ теле. Ҡыңғырау теле. Сәғәт теле.* ■ *Кәмә сыкты. Кумәк йыр башланды. Кемдер баҫты тальян телдәрен.* Ғ. Сәләм.

◆ **Ағас тел** тупаҫ итеп йәки боҙоп һөйләгән кешегә әйтелә. **Ҡоро тел** тик һүҙ һөйләгән, ҡулынан эш килмәгән кешегә әйтелә. **Ҡош теле** *кар.* **ҡош. Оҙон тел** һүҙ йөрөтөүсән, ғәйбәт таратыусан кешегә әйтелә. **Сөсө тел** кәрәгенән тыш яғымлы итеп, ярамһаҡланып һөйләгән кешегә әйтелә. **Таҫма тел** йомшаҡ һүҙ менән эс-бауырға ингән кешегә әйтелә. **Тел барыу** ҡыйыулыҡ етеү (әйтергә). *[Гөлнар:] Оятһыҙ! Нисек телең барып әйтәһең шул һүҙҙе.* Ғ. Ғүмәр. **Тел биҫтәһе** *кар.* **биҫтә** [2]. **Телгә бөткән** һүҙгә оҫта кешегә әйтелә. **Телде йоторлоҡ** *кар.* **йотоу. Телде [арҡыры] тешләү** 1) өндәшмәҫ булыу, өнһөҙ ҡалыу; 2) арып, хәлдән тайыу. *Теге эт телен арҡыры тешләп, арттарынан саҡ өлгөрә, ти* (Әкиәттән). **Теле ауыҙына һыймай** ауыҙында һүҙ тотмаған кешегә әйтелә. **Телеңде сөсө ашағыр** әсе телле, яһил кешене әрләп әйтелә. **Тел культураһы** яҙыу йәки һөйләү телен лексик-грамматик һәм стилистик йәһәттән дөрөҫ, матур итеп төҙөү кимәле. **Тел тигәндә телеп һала** һүҙгә бик оҫта кешегә әйтелә. **Туҡмаҡ тел** тупаҫ һүҙле кешегә әйтелә. **Әсе телле** яман уҫал һүҙле кешегә әйтелә.— *Ғәфү итегеҙ, әфәнделәр, туташтар, мөхтәрәм гөләмәләр. Беҙ әсе телле. Беҙҙең телдәр һеҙгә ҡарыулаша, ҡарыулаша шулай уҫалланған улар.* Б. Ишемғол. ● *Татлы тел йыланды өңөнән сығарыр.* Әйтем.

**ТЕЛАҘАР** *с. диал.* Телдәр.

**ТЕЛ-АУЫҘ** *и. диал. йыйн.* Тауыш-тын. *Тел-ауыҙ ишетелмәй.*

**ТЕЛБИҪТӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Күп һөйләүсәнгә, тел биҫтәһенә әйләнеү; тел биҫтәһе булыу.

**ТЕЛГЕЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **телгеләү.** *Таҫма-таҫма булып телгеләнгән күҙ күреме етмәҫ киң ҡырҙар.* Р. Ниғмәти.

**ТЕЛГЕЛӘҮ** *ҡ.* Киҫәк-киҫәк итеп йәки төрлө бер ерҙән телеү. *Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарҙың арҡаһын телгеләп, ул әйткән нәмәләрҙе берәм-берәм алды, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ТЕЛГЕСЛӘҮ** *ҡ. көс. ҡар.* **телгеләү.** *Икмәкте телгесләү.*

**ТЕЛГӘР** *и.* Телгә оҫта кеше.

● *Батыр яуҙа беленер, телгәр дауҙа беленер.* Әйтем.

**ТЕЛГӘШЕҮ** *ҡ. диал.* Хәлләнеү.

**ТЕЛДЕРЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **телеү** 1.

**ТЕЛДӘН** *р.* Яҙмаған көйө, тел менән. *Телдән һөйләү.*

**ТЕЛДӘР** *с.* Һүҙгә әүәҫ, һүҙгә оҫта; һүҙсән. *Минең юлдаш телдәр булып сыҡты. Юлда ла, килеп урынлашҡас та үҙ тормошона бәйле күп нәмә һөйләп алды.* К. Мәргән. *Бәләкәс һеңлем Гөлдәр бигерәк инде телдәр, ауыҙы һис буш тормай, әллә ниҙәр бытылдай.* А. Игебаев.

**ТЕЛДӘРЛӘНЕҮ** *ҡ.* Телдәргә әйләнеү, телдәр булыу. *[Кәримә:] Бигерәк телдәрләнеп киткәнһең, олатайыңа һөйләргә лә ирек бирмәйһең.* Р. Ғабдрахманов.

**ТЕЛЕВИ́ДЕНИЕ** [*рус.*] *и.* Һүрәттең тауыш менән бергә электр сигналдары ярҙамында радио йәки сымдар аша алыҫҡа биреләше. *Телевидение программаһы. Телевидение системаһы. Телевидение техникаһы.*

**ТЕЛЕВИЗИОН** [*рус.* телевизионный] *с.* **1.** Телевидение ярҙамында тауыш менән бергә һүрәтте тапшырыу һәм ҡабул итеүгә тәғәйенле. *Телевизион антенна. Телевизион приёмник.*

**2.** Телевидение ярҙамында башҡарылған. *Телевизион тапшырыуҙар. Телевизион фильм.*

**ТЕЛЕВИ́ЗОР** [*рус.* ⟨ *гр.+лат.*] *и.* Телевидение ярҙамында тапшырыу программаһының сигналдарын көсәйтеп, һүрәт менән тауышҡа үҙгәртеү өсөн тәғәйенләнгән телевизион приёмник. *Телевизор ҡарау. Телевизор экраны.*

**ТЕЛЕГРА́ММА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Телеграф аша тапшырылған хәбәр һәм шулай уҡ шундай хәбәр яҙылған бланк. *Телеграмма алыу. Телеграмма биреү.* ■ *[Яҡуп:] Беҙгә ҡотлау телеграммаһы бар, уҡып ишеттерергә рөхсәт итегеҙ.* Б. Бикбай. *Мәхмүт кеҫәһенән блокнотын сығарып, телеграмманың тексын да яҙып ташланы.* Ф. Лоҡманов. *Ауыл еренә килһә, хат килә, телеграмма һуғыусы һирәк.* Ш. Янбаев.

**ТЕЛЕГРА́Ф** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Ашығыс хәбәрҙе алыҫ араға тиҙ еткерә торған радио һәм электр элемтәһе төрө. *Телеграф менән хәбәр*

*итеү. Телеграф бәйләнеше. Телеграф хеҙмәте.* ■ *Башҡорт дивизияһы оборона тотҡан участкала сағыштырмаса тыныслыҡ булһа ла телеграф фронттарҙан хәүефле хәбәрҙәр килтереп торҙо.* Ә. Ихсан.

**2.** Шундай хәбәрҙәрҙе тапшыра һәм ҡабул итә торған элемтә бүлеге һәм шул учреждение урынлашҡан бина. *Телеграф начальнигы.*

**3.** Шундай хәбәр ебәрә һәм ҡабул итә торған аппарат. *Телеграф сигналы. Телеграф таҫмаһы.* ■ *Ел .. ер өҫтөнән һанһыҙ кар бөртөктәрен ҡайнатып, ҡыуып йөрөтә. Бындай көндәрҙә телеграф бағаналары айырыуса нык гәүләй.* Ш. Янбаев.

**ТЕЛЕГРАФИ́СТ** [*рус.*] *и.* Телеграфта эшләгән, телеграммалар ҡабул итә һәм ебәрә торған кеше.

**ТЕЛЕК** *с.* Телеп ҡуйылған, йырыҡ. *Телек итәк.* ■ *Тамғалары балға, инәүе яра телек булған, ти* (Хикәйәттән).

**ТЕЛЕКА́МЕРА** [*рус.*] *и.* Телевизион тапшырғыс камера (объекттың яҡтылыҡ менән һүрәтләнешен электр сигналдарына әүерелдерә).

**ТЕ́ЛЕКС** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Телеграф аша хәбәрләшеүҙең илдәр араһындағы бәйләнеш селтәре.

**ТЕЛЕМ** *и.* **1.** Берәй төрлө ашамлыҡтың бысаҡ менән телеп алынған яҫы ҙур өлөшө. *Бер телем икмәк. Ҡарбуҙ телеме. Йоҡа телем. Ҙур телем.* ■ *[Ғази] сүлмәктән ҡаймаҡ ҡайырып алып, икмәк телеменә яҡты.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Ниҙән дә булһа телеп алынған оҙон тар өлөш йәки шуның кеүегерәк формалағы бүтән нәмә. *Йүкә телеме. Ҡайыш телеме.* ■ *Зөлхизәһе картатаһының йөрәген телемдәргә телгеләй торған шундай йыр уйлап сығарған хәҙер.* З. Биишева.

**ТЕЛЕМЕХАНИК** *с.* Телемеханикаға мөнәсәбәтле. *Телемеханик ҡорамал.*

**ТЕЛЕМЕХА́НИКА** [*рус.*] *и.* **1.** Элемтә саралары ярҙамында эш процесында алыҫтан башҡарылған идара.

**2.** Фән һәм техниканың шул идараны өйрәнгән бүлеге.

**ТЕЛЕМЛЕ** *с.* Телем-телем итеп ҡырҡылған. *Телемле икмәк.*

**ТЕЛЕМЛӘҮ** *ҡ.* Телем-телем итеү. *Рәхимә .. оҙон ҡаҙыларҙы .. телемләп ҡырҡҡылай.* Һ. Дәүләтшина.

**ТЕЛЕНЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **телеү**. *Теленгән икмәк.*

**ТЕЛЕОБЪЕКТИ́В** [*рус.*] *и.* Алыҫтағы нәмәне төшөрә торған фотографик объектив.

**ТЕЛЕСКО́П** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Күк йөҙөндәге есемдәрҙе күҙәтә торған оптик прибор. *Телескоптан күҙәтеү.*

**ТЕЛЕТА́ЙП** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Яҙыу машинаһыныҡы кеүек баҫмаҡлы телеграф аппараты. *Телетайп хәбәрҙәре.*

**ТЕЛЕҮ** *ҡ.* **1.** Оҙон йоҡа итеп буйға ҡырҡыу; ярыу. *Ҡайыш телеү.* ■ *Барый .. мейес алдында талпына-талпына сыра телеп аҙаплана ине.* Р. Ғабдрахманов. *Икмәктәй итеп тупраҡты ҡайырып телә төрән.* Р. Назаров. *Арыҫландың шунда телен телә батыр.* «Бабсаҡ менән Күсәк». / Йоҡа яҫы итеп ҡырҡыу. *Алма телеү. Ҡарбуз телеү. Ҡауын телеү. Ҡыяр телеү.* ■ *[Гөлйөҙөм] ашъяулыҡ уратып Айбулаттың юлдан ҡайтҡан икмәген телеп һалды.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ниҙеңдер өҫтөндә һыҙат-һыҙат рәүешендә буй эҙ ҡалдырыу, һыҙат булып үтеү, ятыу. *Юлға төшәлгән .. ҡырсын табандарҙы телә.* Б. Бикбай. *Күкте телеп йәшен атһа, тертләп китә ҡайын ҡурҡҡандай.* Я. Ҡолмой. *Үттар яна; телеп төн ҡараһын, күккә үрелә усаҡ ялҡыны.* Р. Сафин. / *күсм.* Һауала киҫкен яңғырау, һауаға киҫкен таралыу. *Тик ҡайҙалыр аҡрын ғына йыр тауышы телә таң тынын.* Р. Ниғмәти. *Гудок һауа телде... Гудок менән: — Гөлнур?! — Әхмәт! — тигән өн түлҡынды Иҙел өҫтөндә.* Ғ. Сәләм.

**3.** *күсм.* Күңел ғазабы килтереү, рухи ғазап сиктереү, бик ныҡ әрнетеү, әсендереү. — *Һуғыш! Бына был һүҙ айҡап сыҡты бөтә аҡланды. Көләс йөҙҙө һөрөмләндерҙе ул, шат йөрәкте телде.* З. Биишева.

**ТЕЛЕҮЛЕ** *с.* Телеп ҡуйылған. *Телеүле икмәк.*

**ТЕЛЕФО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Телмәрҙе алыҫ араға электр сигналдарын сым йәки радио сигналдар аша тапшырыуҙы тәьмин итә торған электр элемтәһе төрө, шулай уҡ шундай тапшырыу өсөн булған техник йәйланмалар системаһы. *Ҡала-ара телефон. Телефон бәйләнеше. Телефон селтәре. Телефон станцияһы. Телефон сымы. Телефон үткәреү. Телефондан һөйләшеү.*

**2.** Шул элемтә төрө ярҙамында һөйләшеү өсөн сигналлы шылтыраҡ һәм трубка менән тәьмин ителгән аппарат. *Телефон трубкаһы. Телефондан шылтыратыу.*

♦ **Боҙоҡ телефон** уйын исеме (теҙелеп ултыралар; алып барыусы береһенең ҡолағына бер һүҙ әйтә, ул эргәһендәге кешегә тапшыра; шул һүҙ иң аҙаҡҡы кешегә барып еткәс, алып барыусы унан теге һүҙҙе һорай; дөрөҫ әйтмәһә, һүҙҙе боҙған кешене табып, бер нәмәһен ала; һуңынан төрлө һөнәр күрһәтеп, нәмәләрен кире алалар). **Йүкә телефон** һүҙҙең кешенән кешегә таралышы. *Ауылда йүкә телефон тигән нәмә бик шәп эшләй бит ул. «Юғалған Ғөбәйҙулла ҡайтҡан икән», — тигән хәбәр .. таралып та өлгөргән.* Р. Солтангәрәев.

**ТЕЛЕФО́Н-АВТОМА́Т** [*рус.*] *и.* Аҡса һалғас автоматик рәүештә тоташа торған, бөтә кеше лә файҙалана алған телефон аппараты.

**ТЕЛЕФОНИ́СТ** [*рус.*] *и.* **1.** Телефон станцияһында эшләгән хеҙмәткәр.

**2.** Хәрби элемтәсе, телефон линияһы һуҙыу буйынса белгәс. *Кабель таҡҡан телефон тартмаһын күтәреп, тәрән ҡарға бата-сума йүгергән телефонист күренде.* Д. Исламов.

**ТЕЛЕФОНЛАШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **телефонлаштырыу.**

**ТЕЛЕФОНЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Телефонлы итеү, телефон үткәреү. *Ауылдардарҙы телефонлаштырыу.*

**ТЕЛЕФОНОГРА́ММА** [*рус.*] *и.* Телефондан тапшырылған рәсми хәбәр. *Телефонограмма алыу. Телефонограмма биреү.*

**ТЕЛЕШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **телеү** 1. *Сыра телешеү.*

**ТЕЛЛЕ-ТЕШЛЕ** *с.* Үткер, батыр һүҙле. *Телле-тешле кеше.*

**ТЕЛЛӘ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Алтын аҡса. *Һәр кемдең бит башы үҙенә гәзиз, мең-мең теллә бирһә лә һатылмай* (Халыҡ йырынан).

**ТЕЛЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Нимәлер тураһында күп һөйләү, һүҙсәнгә әйләнеү; һөйләшә башлау. *Шулай телләнделәр һалдаттар, ирек менән йыуып йөрәкте.* Д. Юлтый. *[Старшина — Ҡормайға:] Халыҡты элек ҡотортҡаның өсөн бирелгән биш йыл һөргөн аҙ булдымы ни һиңә? Күп телләнһәң, мин тағы ла ебәртә белермән.* Б. Бикбай.

**2.** Айырым сифаттар менән килеп кешенең ҡылығын күрһәткән һүҙбәйләнеш яһай. *Сөсө телләнеү. Таҫма телләнеү. Төртмә телләнеү. Әсе телләнеү.* ■ *— Ярар, ил тыҡ булһын. Ил тыҡ булһа, сыпсыҡ үлмәҫ! — тип, [килгәндәрҙең] күңеленә йылы өрөргә тырышып, йомшаҡ телләнеп оҙата торҙо Аллаяр.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТЕЛЛӘҮ** *к.* **1.** Тел (7 мәғ.) ҡуйыу, телле итеү. *Шәлде телләп бәйләү.*

**2.** *диал.* Әрләү.

**ТЕЛЛӘШЕҮ** *к.* Ҡаршы һүҙ әйтеү, ҡаршы әйтешеү. *[Иҙел:] Шайтан ҡыҙыҡай! Йыуаш ҡына күренһә лә, ҡалай телләшә.* Ш. Насыров.

**ТЕЛМӘ** *и.* Теленеп-теленеп, ҡып-ҡыҙыл булып янып, йәйелеп киткән йоғошло шешек.

**ТЕЛМӘР** *и.* **1.** Халыҡ алдына сығып һөйләгән һүҙ; сығыш. *Телмәр тыңлау. Телмәр һөйләү.*

**2.** Уй, фекерҙе эсенә алған һүҙ, һөйләгән һүҙ. *Уҡылған китаптарҙы уҡыусыларҙан һөйләтеү ҙә телмәрҙе үҫтереү һәм балаларҙың аңын киңәйтеү өсөн билдәле әһәмиәткә эйә.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1965, № 1.

♦ **Ситләтелгән телмәр** *грам.* кешенең һөйләмендә йөкмәткеһе генә һаҡланып, төҙөлөшө үҙгәртеп бирелгән һүҙе. **Тура телмәр** *грам.* кешенең һөйләмдә үҙгәртмәй бирелгән һүҙе.

**ТЕЛОГРЕ́ЙКА** [*рус.*] *и. кар.* **һырма** [2].

**ТЕЛСЕ** *и.* Тел өйрәнеү өлкәһендә эшләгән белгес.

**ТЕЛСӘН** *с.* Телгә, һүҙгә шәп; телдәр, һүҙсән. *Ул [Стариков] шаҡтай телсән әҙәм булғанлыҡтан, кеше менән тиҙ таныша, аралаша ине.* Ғ. Ғүмәр.

**ТЕЛСӘНЛӘНЕҮ** *к.* Телсәнгә әйләнеү, телсән булыу. *Телсәнләнеп, ҡысҡырып, даусы булма, киленсәк* (Туй йырынан).

**ТЕЛСӘР** *с. кар.* **телдәр.**

**ТЕЛ-ТЕШ** *и. йыйн.* Төрлө һүҙ, ғәйбәт. *Тел-теш ҡубәйеү. Тел-теш тейеү.* ■ *Көтөр Үҫәргән ырыуын ташлап, Ҡатай ырыуына күсә. Көтөр бында тел-тешкә эләкмәй, боронго данын юймай* (Хикәйәттән).

♦ **Тел-теш баҫыу** ырым буйынса, кеше һүҙенең зәхмәте тейеү. *[Имсе:] Һиңә ен ҡағылған, һине күрә алмайҙар икән. Тел-теш баҫҡан, яҫтығыңа сихыр кергән.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1968, № 5.

**ТЕЛ-ТЕШЛЕ** *с.* Үткер, батыр һүҙле. *Тел-тешле йәштәр. // [Ныязгол:] Айбулат .. көйөк тел-тешлеләре һуғышҡа ҡыуылһа, ҡалғандары уның ҡалай итһәң дә күерҙәр.* Һ. Дәүләтшина.

**ТЕЛ-ТЕШҺЕҘ** *с.* Һүҙгә йыуаш; яуапһыҙ. *Тел-тешһеҙ кеше.*

**ТЕЛҺЕҘ** *с.* **1.** Тыумыштан һаңғырау булыуҙан йәки башҡа ауырыуҙан тел белмәгән, һөйләшә алмаған. *Телһеҙҙәр ҙә йырлай үҙенсә, ләкин килеп сыҡмай һиненсә.* Ғ. Хәйри.

**2.** *кусм.* Өнө, тауышы юҡ, һүҙһеҙ. *Телһеҙ булыу. Телһеҙ ҡалыу.*

● *Илһеҙ ир — телһеҙ ҡол.* Әйтем.

**ТЕЛҺЕҘЛӘНЕҮ** *к.* Телһеҙгә (1 мәғ.) әйләнеү, телһеҙ булыу. *Телһеҙләнеп ҡалыу.*

**ТЕЛЬНЯ́ШКА** [*рус.*] *и.* Матростарҙың эстән кейә торған буйлы бәйләм күлдәге.

**ТЕЛӘГӘНСӘ** *р.* Ҡәнәғәт булғанса, туйғанса. *[Бабай:] Һыу үҙ ҡулыңда булғас, телә гәнсә эсеп тик ята* (Әкиәттән).

**ТЕЛӘК** *и.* **1.** Ниҙер булдырырға, эшләргә тигән күңел ынтылышы. *Уҡыу теләге. Теләк белдереү. Теләккә ирешеү.* ■ *Уның [Әбйәлилдең], менеп йөрөргә яҡшы атың булһын ине, тигән теләге булған икән. Әбйәлил күл эйәһенән .. ат һорамаҡсы булған* (Әкиәттән). / Кешенең ихтыяры, ирке. *Теләккә ҡарау.* ■ *[Өйрәнсектең] хәле ысынлап та бик мөшкөлдөр. Юҡһа, үҙ теләге менән былдай эшкә барыр инеме.* З. Биишева.

**2.** Ниҙер булыуын, эшләнеүен күңелгә ярашлы, кәрәк һанап әйткән һүҙ. *Айбулат менән Зөфәр Григорий Ивановичтан кәңәш менән яҡшы теләк .. алып кит[те].* Һ. Дәүләтшина. *Теләккәйҙәр теләп ҡалды әсәй, әрмеләрҙән иҫән ҡайтһын, тип* (Халыҡ йырынан).

**3.** *иҫк.* Хоҙайҙан ниҙер үтенеү йолаһы. *Элек ямғыр булмаһа, ямғыр теләгенә сыҡҡандар.*

□ **Теләк итеү** теләү.

♦ **Бата теләк** *кар.* **бата. Теләк йыры** *кар.* **йыр.**

**ТЕЛӘКСЕ** *и.* Туйҙа һ. б. урында теләк әйтеүсе. *[Суфия:] Теләкселәр, килегеҙ әле! .. Хәйер бирәйем үҙегеҙгә. [Гөлйөҙөм:] Рәхмәт, Байбикә, теләкселәр шиғырҙы хәйер өсөн әйтмәй.* К. Мәргән.

**ТЕЛӘКТӘШ** *и.* Бер уй, теләктәге кешеләр. // *Теләктәш кеше. Теләктәш булыу.* ■ *Ысын күңелдән мин теләктәш, алға баҫ баҫҡан һайын, изге матлапҡа табантын юлдар ас асҡан һайын.* Ш. Бабич.

**ТЕЛӘКТӘШЛЕК** *и.* Уй, теләк берлеге. *Теләктәшлек тойғоһо. Теләктәшлек белдереү. Теләктәшлек күрһәтеү. Теләктәшлек табыу.*

**ТЕЛЕНДЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **теләнеү.**

**ТЕЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Кеше нәмәһен һорау; һораныу.

**2.** Хәйер һорау; һораныу, хәйерселәү. *Теләнеп көн күреү.* ■ *Шәрифтең фекере .. теләнеп булһа ла, .. өйҙә яткан астарҙы туйҙырыу ине.* М. Ғафури.

● *Ир үтә алмаған йылға юҡ, теләнмәгән мулла юҡ.* Әйтем.

**ТЕЛӘНСЕ**[1] *и.* **1.** Төрлө нәмә һорап йонсоутоусан кеше.

**2.** Хәйер һорап йөрөгән кеше; хәйерсе.

● *Асты теләнсе ҡыҫтар.* Мәҡәл. *Теләнсенең бите ҡара, ҡуйыны тулы.* Мәҡәл.

**ТЕЛӘНСЕ**[2] *и.* Көрөҫкә еп үткәрә торған ырғаҡлы ағас.

**ТЕЛӘНСЕЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Кешенән ныҡып нәмә һорау; һораныу. *Тәмәкене икмәк урынына ашаған Ҡоно иртәнән бирле сигарета теләнселәй.* Ә. Бикчәнтәев.

**2.** Хәйер һорау; хәйерселәү. *Теләнселәп йөрөү.*

**ТЕЛӘР-ТЕЛӘМӘҪ** *р.* Ул тиклем, бигүк теләмәйенсә. *Яланбикә теләр-теләмәҫ ауыр, аҡрын атлап, Гөлйөҙөмдөң артынан эйәрҙе.* Һ. Дәүләтшина. *Сәғиҙәнең тартыныр, теләр-теләмәҫ кенә яуап ҡайтарыуын күргәс, Гөлнур һүҙҙе икенсегә борҙо.* М. Тажи.

**ТЕЛӘҮ**[1] *ҡ.* **1.** Нимәгәлер күңел ятышы, күңел ынтылышы тойоу. *Бала теләү. Теләгән нәмә.* ■ *Кемдәр күрмәгән Мәскәүҙе, улар күрергә теләй.* Р. Ниғмәти. *Ҡарттар улдарын бик яратҡан, ни теләһә, шуны үтәргә әҙер торған, ти* (Әкиәттән). / Ниҙер эшләргә ниәт итеү. *Гәрәй .. һаҡланырға теләп, ҡулына бысаҡ алды.* Б. Бикбай. / *шарт ҡ. ф.* Ниҙелер берәүҙең иркенә ҡуйғанда ҡулланыла.— *Беҙҙең фатир ҙур, айырым бүлмәләр бар. Теләһәгеҙ, беседкала йоҡларға мөмкин.* Д. Юлтый.

**2.** Ниҙеңдер булыуын, эшләнеүен күңелгә ятышлы, кәрәкле һанап, һүҙ әйтеү. *Теләк теләү. Теләп алыу. Хәйерле юл теләү.* ■ *Йомарт Гөлбоҫтанға оҙон ғүмер, ырыҫ, Аҡназарға баш һаулығы теләп, рәхмәт уҡынылар.* Ғ. Дәүләтшин.

◆ **Теләгән бер** һәр төрлө. *Уралып ятҡан Уралда .. теләгән бер януар бар* (Ҡобайырҙан).

● *Йәне теләгән йылан ите ашаған.* Мәҡәл.

**ТЕЛӘҮ**[2] *и.* Табындарға ингән бер башҡорт ырыуының исеме.

**ТЕЛӘҺӘ** *киҫ.* «Кем», «ни», «нимә», «ниндәй», «нисек», «калай», «ҡайҙа» тигән һүҙҙәр менән килеп, шуларҙың мәғәнәһенә кире төҫмөр бирә. *Теләһә ҡайҙа йөрөү. Теләһә ҡалай эшләү. Теләһә ни һөйләү. Теләһә ниндәй һүҙ. Теләһә нисек йоҡлау.* ■ *[Шатморат:] Халыҡ мөлкәте бер аҙ таралды ситкә. Теләһә кем теләгәнен килә лә алып китә.* С. Кулибай.— *Хужа ҡушҡас, эшләргә кәрәк. Тәндәрең ауыртмағай, теләһә ни эшләһен.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТЕ́МА** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Хикәйәләү, һүрәтләү, тикшереү өсөн билдәләнгән мәсьәлә. *Докладтың темаһы. Тарихи темаға яҙылған роман.* ■ *Диссертант бәхәсле тема һайлап алған һәм уны бик оҫта хәл иткән.* Т. Сәғитов. / Һөйләшкән, әңгәмәләшкән мәсьәлә. *Кузьма үҙенең ҡыҙыҡтарын ҡутарып сығарҙы.. Бындай темаға уның бер ҙә һөйләгәне юҡ ине әле.* С. Агиш.

**ТЕМАТИК** *с.* Ниндәйҙер бер темаға мөнәсәбәтле. *Тематик план.* / Берәй темаға бағышлы. *Тематик кисә.*

**ТЕМА́ТИКА** [*рус.*] *и.* Темалар йыйылмаһы. *Егерменсе йылдар аҙағында Рәшит Ниғмәти поэзияһында колхоз ауылы менән бәйләнешле тематика нығырак тамыр йәйә.* Ғ. Хөсәйенов.

**ТЕМБР** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Тауыштың үҙенә бер төрлө сифаты. *Тәрән тойғоло, йомшаҡ тембрлы тауыш уның [Әсмәнең] төп йырсылыҡ сифаты булып, бөтә ижади юлында һаҡланып килә.* З. Биишева.

**ТЕМЕҪКЕНЕҮ** *ҡ.* Ниҙер өмөт итеп, әҙләнеү, төрлө ерҙе ҡыҙырыу. *Ғариф ағай баҙарсы кеше түгел, .. алып-һатарҙар рәтендә темеҫкенеп йөрөмәй, кәрәк нәмәһен .. һуғып ала ла шуның менән баҙары бөтә.* Б. Бикбай.

**ТЕМП** [*рус.* 〈 *ит.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Музыкаль әҫәрҙе башҡарыу тиҙлеге. *Етеҙ темп. Һалмаҡ темп.* / *спорт.* Хәрәкәт тиҙлеге. *Йүгереү темпы.* ■ *Саңғысылар башта үк ҡыҙыу темп алды.* Б. Бикбай.

**2.** Эш, көрәнештең башҡарылыу тиҙлеге. *Үҫеш темпы. Эш темпы. Юғары темп. Темпты арттырыу. Темпты төшөрөү. Техниканы ремонтлау һәм орлоҡ әҙерләүҙе ҡыҙыу темп менән алып барыу.*

**ТЕМПЕРА́МЕНТ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Кешенең тормош активлығы, ҡылығы менән билдәләнгән психик тәбиғәт. *Ҡыҙыу темперамент. Һалҡын темперамент.* / Айырым профессия кешеһенә хас булған психик үҙенсәлек, эмоциональ көс. *Актерлыҡ темпераменты. Поэтик темперамент. Темперамент менән йырлау.*

**2.** Рухи күтәренкелек, эске активлыҡ һәләте.

**ТЕМПЕРАМЕНТЛЫ** *с.* Ҡыҙыу, ярһыу тәбиғәтле. *Темпераментлы кеше. Темпераментлы итеп һөйләү.*

**ТЕМПЕРАТУ́РА** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Есемдең, матдәнең йылылыҡ кимәле. *Һауа температураһы. Һыуҙың ҡайнау температураһы. Температураның тирбәлеүе. Юғары температура.* ■ *Декабрь-ғинуар айҙарында көн бик һыуыҡ булды. Температура 40 градустан түбән төштө.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 30 ғинуар.

**2.** Кешенең һаулығын, ауырыулығын күрһәткән тән йылыһы. *Температура төшә. Температура күтәрелә.* ■ *Ғәйшә килде, бөтәбеҙгә лә градусник ҡуйып, температураны үлсәне.* С. Агиш. / Ауырыу кешенең тән эҫелеге. *Баланың температураһы бар.*

**ТЕМТЕК** *с.* Кәрәкһеҙгә соҡсоноусан. *Темтек кеше. Темтек булыу.*

**ТЕМТЕКЛӘҮ** *ҡ.* Кәрәкһеҙгә соҡсоноу. *Темтекләп эшләү.*

**ТЕНДЕНЦИОЗ** [*рус.* тенденциозный] *с.* **1.** Билдәле бер тенденцияға нигеҙле, тенденцияға ҡороулы; тенденциялы. *Тенденциоз әҫәр. Тенденциоз яҙыусы.*

**2.** Алдан ҡуйылған бер ҡарашҡа, мөнәсәбәткә нигеҙле. *Реалистик мөнәжәттәр үҙҙәренең тенденциоз булыуы менән мөнәжәт жанрының дини асылына йыш ҡына ҡаршы килә.* Ә. Харисов. / Шәхси мөнәсәбәткә нигеҙле. *Тенденциоз ҡараш.*

**ТЕНДЕ́НЦИЯ** [*рус.* 〈 *нем.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Ҡараш һәм эштәге йүнәлеш, кемгә йәки нимәгәлер хас булған ынтылыш. *Демократик тенден-*

*ция.* ■ *«Мәйеттәр бәйете» — заманы өсөн .. прогрессив тенденциялы әҫәр.* Ә. Харисов.

**2.** Берәй нәмәнең хәрәкәт һәм үҫештәге йүнәлеше. *Авторҙар Башҡортостан эшселәр синыфының һан һәм сифат яғынан үҙгәреү тенденцияһын тикшерә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 22 май.

**3.** Нигеҙҙә ятҡан идея. *Әҫәрҙең тенденцияһы.*

**4.** Алдан уйылған ҡараш, мөнәсәбәт, алдан билдәләнгән идея. *Тенденция менән ҡарау.*

**ТЕНДЕНЦИЯЛЫ** *с.* Билдәле бер тенденцияға нигеҙле, тенденцияға ҡороулы. *Тенденциялы әҫәр. Тенденциялы яҙыусы. Тенденциялы рәүештә һүрәтләү.*

**ТЕ́НДЕР** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* Паровозға тағылып, яғыулыҡ һәм һыу запасы йөрөтөү һәм ярҙамсы яйламаларҙы урынлаштырыу өсөн тәғәйенләнгән махсус конструкциялы вагон.

**ТЕ́ННИС** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* Тупты ракетка менән сетка аша ҡара-ҡаршы һуғып уйнай торған уйын. *Теннис ракеткаһы. Теннис тубы. Теннис уйнау.*

♦ **Өҫтәл теннисы** өҫтәлдә сетка аша һуғып уйнай торған туп уйыны.

**ТЕ́ННИСКА** [*рус.*] *и.* Ҡыҫҡа еңле бәйләгән күлдәк. *Аҡ тенниска кейеп, ҡара юбкаһы менән билен өҙөлдөрөп сыҡҡан саҡтарында ҡыҙ Хәмиткә айырыуса сибәр күренә.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТЕННИССЫ** *и.* Теннис уйнаусы.

**ТЕ́НОР** [*рус.* 〈 *ит.*] *и.* Иң нәҙек ирҙәр тауышы. *Лирик тенор.* ■ *Абдулла .. күкрәген киреп һулыш алды ла тенор менән бер оҙон көйҙө һуҙып ебәрҙе.* К. Мәргән. / Шул тауыш менән йырлаған кеше.

**ТЕНТ** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* Ҡояштан, ямғырҙан һаҡлай торған ҡалын киндер япма. *Ҡоторонған буран машина тентын өҙгөләй.* Я. Хамматов.

**ТЕНТЕТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **тентеү** [1] 1.

**ТЕНТЕҮ** [1] *к.* **1.** Ғәйепләрлек нәмә йәки ғәйепле кешене табыу өсөн бөтә ерҙе аҡтарып, ентекләп эҙләү. *Кешене тентеү. Өйҙө тентеү. Тентеп сығыу.* ■ *Һалдаттар төрлө яҡҡа һибелде. Өйҙөң аҫтын өҫкә килтереп тентеп, бер ни таба алмағас, кәртә артындағы етен араһынан ҡарап сыҡтылар.* Я. Хамматов. *[Казактар] иң элек Камилды тентене. Уның кеҫәһенән партбилет сыҡты.* Р. Ниғмәти. *Ҡыҙ тентей торғас, Таҙҙың киндер күлдәгенең инесе араһынан яулыҡты табып алды, ти* (Әкиәттән).

**2.** Тетеп йөрөп эҙләү. *Атаһы китеү менән Муллағәле өйҙөң аҫтын өҫкә килтереп, тентергә тотона. Тик бер тин акса тапмай.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТЕНТЕҮ** [2] *и.* Йәшергән, тейеш булмаған һ. б. нәмәләрҙе табыу маҡсатында кем йәки ниҙеңдер рәсми ҡаралыуы, ентекләп тикшерелеүе. *Тентеү менән килеү. Тентеү яһау.* ■ *Ауылда тентеү китте. Ауылдың ул осонан был осона ҡыуғын төшөрөп, Сурағолдо эҙләнеләр. Ләкин юк.* Т. Хәйбуллин. *Көнө-төнө тентеүҙәр бара. Унан да, бынан да тотоп ябалар.* И. Насыри.

**ТЕНТЕШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **тентеү** [1].

**ТЕНӘҮГЕ** *р. диал.* Төнә.— *Мында шамбы күп, бына ошондай,— тип беләген һуҙҙы берейһе.— Хәйрулла ағай төртөп алғанын тенәүге үҙем күрҙем.* Я. Хамматов.

**ТЕҢК** *окш.* Ҡаты нәмә менән ҡалынырак тимергә һуғып алғанда сыҡҡан өҙөк тауышты белдергән һүҙ. *Теңк итеү.*

**ТЕҢКЕЛДӘТЕҮ** *к.* Теңк-теңк иттереү, теңк-теңк килтереү.

**ТЕҢКЕЛДӘҮ** *к.* Теңк-теңк итеү, теңк-теңк килеү. *Теңкелдеге сығыу.*

**ТЕҢК-ТЕҢК** *окш.* Ҡабат-ҡабат теңк иткән тауышты белдергән һүҙ. *Теңк-теңк итеү.*

**ТЕҢКӘ** *и. иҫк.* Эске көс, түҙем. *Был хибестең эсе ағас, тышы таш. .. Ваҡыт-ваҡыт йөрәктәрем асалыр, был хибестән теңкәләрем ҡасалыр* (Бәйеттән).

♦ **Теңкәгә тейеү** *ҡар.* **теңкәне ҡоротоу.** *Бер туктауһыҙ ҡойған ямғыр тамам теңкәгә тейә.* Ә. Вәли. **Теңкә ҡороу** түҙемдән сығыу; йөҙәү, йонсоу. *Кис булғанын көтә-көтә теңкәм ҡороп бөттө.* Д. Исламов. **Теңкәне ҡоротоу** бик нык йөҙәтеү, йонсотоу; йәнгә тейеү.

**ТЕҢКӘҺЕҘ** *с.* Ихтыярһыҙ, түҙемһеҙ. *Теңкәһеҙ кеше. // Теңкәһеҙҙәр, ялҡау, прогульщиктар эш ваҡытында «ҡағып» сығалар.* М. Абдуллин.

**ТЕОДОЛИ́Т** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Мөйөш үлсәү ҡоралы (геодезияла, астрономияла, артиллерияла, авиацияла һ. б. ҡулланыла).

**ТЕОКРА́ТИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Политик власть руханиҙар ҡулында булған хакимлек.

**ТЕО́ЛОГ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Теология буйынса белгес.

**ТЕОЛОГИК** *с.* Теологияға мөнәсәбәтле. *Теологик эш.*

**ТЕОЛО́ГИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Алла һәм дин хаҡындағы ćиркәү тәғлимәте.

**ТЕОРЕ́МА** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Дөрөҫлөгө иҫбатлау юлы менән билдәләнгән математик ҡағиҙә. *Пифагор теоремаһы. Теореманы иҫбатлау.*

**ТЕОРЕ́ТИК** [*рус.*] *и.* Теорияға ҡағылышлы мәсьәләләр менән шөғөлләнгән кеше. *В. И. Ленин — марксизмдың бөйөк теоретигы.*

**ТЕОРЕТИ́К** *с.* **1.** Теорияға мөнәсәбәтле. *Теоретик белем. Теоретик мәсьәлә. Теоретик хеҙмәт. Теоретик әҙерлек.* / Теория менән шөғөлләнеүгә ятышлы. *Теоретик аҡыл.* / Фәндең теория мәсьәләләренә бәйле. *Теоретик астрономия. Теоретик физика. Теоретик химия.*

**2.** Абстракт-логик фекер йәки математик иҫәп юлы менән алынған. *Теоретик билдәләмә. Теоретик һығымта.*

**ТЕО́РИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** Тормош тәжрибәһен дөйөмләштереп, тәбиғәт һәм йәмғиәттең үҫеш закондарын билдәләгән логик һығымта. *Революцион теория.*

**2.** Айырым бер фәнде йәки уның өлөшөн тәшкил иткән дөйөм фекерҙәр. *Ихтималлыҡ теорияһы. Нисбәтлек теорияһы.* / Айырым бер эш йәки сәнғәт оҫталығының нигеҙендә ятҡан белем һәм ҡағиҙәләр. *Композиция теорияһы. Музыка теорияһы. Шахмат теорияһы.*

**3.** Хәл йәки күренеште аңлатҡан дөйөм принцип нигеҙҙәре. *Кванттар теорияһы. Маркстың экономик теорияһы.*

**ТЕП-** *киҫ.* Те*ᵽ* ижеге менән башланған төп сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһе бирә. *Теп-текә. Теп-теүәл.*

**ТЕПЛИ́ЦА** [*рус.*] *и.* Йәшелсә, үҫемлек үҫтереү өсөн быялалап эшләнгән йылы бина. *Теплица үҫемлеге. Теплица төҙөү.* ■ *[Колхоздың] ике теплицаһы бар. Унда кыяр менән һуған үҫтерелә.* «Совет Башкортостаны», 1964, 22 март.

**ТЕПЛОВО́З** [*рус.*] *и.* Эске яғыулыклы двигатель ярҙамында эшләгән локомотив.

**ТЕПЛОХО́Д** [*рус.*] *и.* Эске яғыулыклы двигателдәр ярҙамында эшләгән карап. *Йылға теплоходы. Диңгеҙ теплоходы.* ■ *Пристань яғынан теплоход тауышы яңғыраны.* Р. Низамов.

**ТЕПЛУ́ШКА** [*рус.*] *и.* **1.** Кеше йөрөтөү өсөн кулайлаштырылып, яғыла торған йөк вагоны. *Уларҙы [һалдаттарҙы] иҙәненә һалам түшәгән теплушкаларға тейәп, көнбайышка оҙаттылар.* Ғ. Локманов.

**2.** Стадиондарҙа, төҙөлөш майҙандарында һ. б. инеп йылына торған бәләкәй такта бина.

**ТЕРАПЁВТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Эске ағзаларҙы дауалаған врач.

**ТЕРАПЕВТИК** *с.* Терапияға мөнәсәбәтле. *Больницаның терапевтик бүлеге.*

**ТЕРАПИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Эске ауырыуҙарҙы операцияһыҙ дауалау эше (дарыу, йылы, электр һәм башкалар менән).

**2.** Медицинаның эске ауырыуҙарҙы билдәләү, уларҙы киҫәтеү һәм дауалау ысулдарын өйрәнә торған бүлеге.

**ТЕРГЕҘЕҮ** *к. диал.* Терелтеү.

**ТЕРЕ** *с.* **1.** Йәне булған, йәшәгән; йәнле; *киреһе* үле. *Тере кеше. Тере булыу. Тере калыу.* ■ *— Әллә бөгөн эшкә бармаһа, шул шахта тип йөрөмәһә, бәлки һау ҙа, тере лә булған булыр ине,— тип Аҫылбикә йәш урынына кан түгә.* Т. Хәйбуллин. *— Айбулат ағайҙың катыны, эй бахыр, тере икән, ә Айбулат ағай юк инде.* һ. Дәүләтшина. // *Пулялар сафтарҙы салғы кеүек саба.. Ләкин терeләрҙе был туктатып тора алмай, улар һаман алға ынтылыуында.* Д. Юлтый. *Һәүбән өйрәкте тере көйө алырға уйлап, уғы менән канатын ғына имгәткән, ти.* «Акбуҙат». Донъянан китмәгән, үлмәгән; иҫән. *Ә Әхмәтте тиһең? .. Мин белмәйем, теремелер, бөгөн кайҙалыр.* Ғ. Сәләм.

**2.** *күсм.* Ысын хәлендәге, ап-асык беленеп, күренеп һ. б. торған. *Тере дошман. Тере йәтим. Тере хәсрәт. Тере ялкау.* ■ *[Тәскирә:] Өйләнер инең, исмаһам, күҙ алдында тере көйөк булып йәнемде карайтып йөрөмәҫ инең.* М. Хәйҙәров.

**3.** Тотош окшап, килеп торған; һуйып каплаған. *Тере атаһы.* ■ *Бөтөнләй башка кеше [Корбанов], ә карашы, каш емереүҙәре теп-тере шул элекке һымак.* Б. Бикбай.

**4.** *күсм.* Иҙелмәгән, һытылмаған (бөртөклө нәмәгә карата); *[Сәрбиямал:] Төйгөсөңдө киленең кап уртаһына ғына туралап төшөр,.. ярма тере генә булһын, онталмаһын.* З. Биишева.

**5.** *күсм. диал.* Теремек. *Тере күҙҙәр.* ■ *— Бик тере, сәсрәп торған кеүек күренәһең һин, акыллым. Бик окшап киттең әле миңә.* С. Агиш.

◆ **Ни үле, ни тере түгел** *кар.* **үле. Тере күмер** *кар.* **күмер. Тере мәйет** *кар.* **мәйет. Тере кул булыу** (*йәки* **итеү**) *кар.* **кул** [1]. **Тере һыу** *кар.* **һыу.**

**ТЕРЕГӨМӨШ** *и.* Химик элемент, йылтыр акһыл төҫтәге шыйык ауыр металл. *Терегөмөш тамсыһы. Терегөмөш рудаһы.* ■ *Йылға .. шыма кырсынташтар араһынан терегөмөштәй ак, саф булып сылтырап аға.* З. Биишева. *Градустарҙа терегөмөш туңа, калын туңа боҙҙар йылғала.* М. Хәй.

**ТЕРЕК** [1] *с. кар.* **тере** 2. *[Күсәк:] Минең атайымды әле бирәү ҙә үлтергәне юк, ул терек.* «Бабсак менән Күсәк».

**ТЕРЕК** [2] *и.* **1.** *кар.* **мал** 1. *Терек аҫрау.*

**2.** *кар.* **тереклек** 2. *Терегe өсөн кем һуң йән көҙгөн күҙләмәй.* Т. Хәйбуллин.

**ТЕРЕКЛЕК** *и.* **1.** Йән эйәһе, йәнлек, хайуан. *Бөтә ер өҫтө, бөтә тереклек .. кояш яктыһын күрергә ашыға ине.* К. Мәргән. *Йәшә, кояш, мин котлайым һине, һинһеҙ һис тереклек булмаҫ ине.* М. Хәй.

**2.** Материя хәрәкәтенең үҫеш этабындағы айырым бер формаһы. *Тереклектең нигеҙе — акһымдар. Ерҙә тереклектең барлыкка килеүе.*

**3.** Көнкүреш, тормош. *Тереклек өсөн кәрәк булған өй корамалдары һәммәһе матур итеп йыйып куйылған.* Ғ. Дәүләтшин.

□ **Тереклек итеү** йәшәү.

**ТЕРЕЛЕҮ** *к.* **1.** Киренән тере хәлгә килеү; йән инеү. *[Кинйәбай:] Шәғәле үлгәс тә хоҙай тәғәләне иҫертеп, терелеп сығыр әле ул.* С. Мифтахов. *Ергә гүйә һулыш өрөлдө, шиңгән үлән гүйә терелде.* М. Кәрим.

**2.** *күсм.* Рухланып, күңелләнеп, хәрәкәткә килеү; йәнләнеү. *[Маһираның] ауыҙына һыу тамыҙҙым, ләкин ирендәрендә хәрәкәт юк. Тағы тамыҙҙым.. Бер аҙҙан ауыҙындағы һыуын йотто, кулын кыбырлатты. Мин терелеп киттем.* Д. Юлтый. *Терелләр юлдар. Автобустар кыҙ һәм егеттәрҙе тейәгән.* Ғ. Сәләм.

**3.** *диал.* Һауығыу, шәбәйеү.

**ТЕРЕЛТЕҮ** *к.* **1.** Киренән тере хәлгә килтереү, йән индереү. *Котлоярҙың тыныс, иркен тауышы, был моңһоулыкка йән өрөп, терелткәндәй, айырым яңғырай.* һ. Дәүләтшина. *[Таҙ — кыҙға:] Үлгән әсәйемде терелтмәй тороп, һинең менән бергә була алмайым* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Рухландырып, күңелләндереп, хәрәкәткә килтереү; йәнләндереү. *Революция кырккан Миңьян тамырын, ә нәп яңынан аҙырак терелткән.* Ғ. Сәләм.

◆ **Самауырҙы терелтеү** *кар.* **самауыр.**

**ТЕРЕЛӘЙ** *р.* **1.** Тере көйө. *ТерелӘй күмеү.* ■ *Абдрахманды нисек тә терелӘй әсир итмәксе булған актар.* Ә. Вахитов.

**2.** *күсм.* Бөтөн көйө; бөтәүләй. *Икмәкте терелӘй йотоу.*

◆ **ТерелӘй [тотоп] ашау** бик нык кыйырһытыу, көн күрһәтмәй әрләү. *[Мүйылбикә:] Был ни тигән эш инде, балам. Атайың булһа, атайың терелӘй ашап алып бара.* һ. Дәүләтшина. **ТерелӘй гүргә тығыу** ҙур кайғыға, ғазапка калыу. **ТерелӘй [тотоп] тунау** *шул ук* **терелӘй тирене тунау** (*кар.* **тире** [1]). *Англичандар бигерәк үҫал — терелӘй тотоп тунайҙар* (Бәйеттән).

**ТЕРЕЛӘТӘ** *р. кар.* **терелӘй.** *ТерелӘтә һәләк итеү.*

**ТЕРЕМЕК** *с.* Эш-хәрәкәткә етеҙ; хәрәкәтсән. *Теремек бала.* ■ *Ғәйшә бик теремек кыҙыкай. Һис баҫкан урынында сыҙап тора алмай.* Ш. Насыров. / Алан-йолан йүгереп, уйнап тороусан (күҙ-карашка карата). *Уның [Муллагәленең] бәләкәй теремек күҙҙәре әле карсыгына, әле шкафка йүгергеләй.* Р. Солтангәрәев. // *[Фатиманың] ауырыган сагында эскә баткан, нурһыҙланган күҙҙәре тагы теремек карай башланы.* Ж. Кейекбаев.

**ТЕРЕМЕКЛӘНЕҮ** *к.* Теремеккә әйләнеү, теремек булыу. *Кешеләр теремекләнеп, .. һәр кем нисек булдыра — шулай эшләргә, сәсергә кереште.* З. Биишева.

**ТЕРКЕ** *и.* Йәш карағай; бешә. *Терке ултыртыу.*

**ТЕРКЕЛЕК** *и.* Йәш карағайлык.

**ТЕРКӘ** *и. иҫк.* Үлгән кешенән туғандарына калған милек; мираҫ. *Мине һултык старшинаның теркә малын китап хөкөмө берлә мираҫ эйәләре араһында бләшер өсөн Уран иләүенә: Уртауыл тигән ауылга алдырҙылар.* «Батыршаның хаты».

**ТЕРКӘЛЕҮ** *к. төш. кар.* **теркәү** [1]. *Исемлеккә теркәлеү.*

**ТЕРКӘМӘ** [1] *и. диал.* Әмәйлек.

**ТЕРКӘМӘ** [2] *и. диал.* Төкәтмә.

**ТЕРКӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **теркәү** [1]. *Исемлеккә теркәтеү. Теркәтеп ектереү.*

**ТЕРКӘҮ** [1] *к.* **1.** Төпкә егелгән малдың эргәһенә кушарлау. *Теркәп егеү. Оло атты төпкә егеп, тай теркәп киттек.*

**2.** Төп өлөшкә кушыу. *Наил менән Фәнисә тураһында .. кем нимә белә — бөтәһен дә йыйҙым, бөтәһен дә эшкә теркәнем.* Х. Зарипов.

**3.** Иҫәпкә алыу, иҫәпкә алып яҙыу. *Кешенең сыгышын протоколга теркәү.* ■ *Кавказ сәфәрҙәрен, ул сәфәрҙәге аҙап, вакигаларҙы теркәһәң — үҙе бер тарих.* Д. Юлтый. *Кемдәрҙеңдер семья башлауҙарын теркәр тагы загс өҫтәле.* Ғ. Сәләм. *Өй йыһаздарын теркәп бөтөп, .. кәртә-кураларҙы барларга сыктылар.* Б. Бикбай. *Разведка төркөмөнә уның [Хәбиевтың] да исемен теркәнеләр.* С. Әлибаев.

**ТЕРКӘҮ** [2] *и.* Кушлап еккән урын. *Теркәүгә егеү. Теркәүҙәге ат.*

**ТЕРКӘҮЕС** *и. лингв.* Һөйләм киҫәктәрен, һөйләмдәрҙе бер-береһенә теркәү өсөн кулланылған ярҙамсы һүҙ (мәҫ. йәнә, тағы, тик). *Аныклау теркәүестәре. Бүлеү теркәүестәре. Йыйыу теркәүестәре. Каршы куйыу теркәүестәре.*

**ТЕРКӘҮСЕ** *и.* Исемлеккә һ. б. теркәп яҙыусы.

**ТЕРКӘШЕҮ** *к. диал.* Кушылыу, ялғаныу. *Яңы ашлыкка теркәшеп киттек.*

**ТЕРЛЕК** *и. диал.* 1. *кар.* **тереклек** 2.

**2.** Мал, байлык.

● *Берлектә — терлек.* Мәкәл.

**ТЕРМАЛЬ** [*рус.* термальный]: **термаль һыу** *геол.* ер аҫтындағы эҫе һыу.

**ТЕРМИК** *с.* Йылылыкка мөнәсәбәтле. *Термик режим. Термик крекинг. Термик тәьҫир.* / Йылылык тәьҫиренә нигеҙле. *Нефть эҙләүҙең термик ысулы.*

**ТЕ́РМИН** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Айырым эш, белем өлкәһендә билдәле бер төшөнсәне белдергән махсус һүҙ. *Ботаника терминдары. Техник терминдар.*

**ТЕРМИНОЛОГИК** *с.* Терминологияға мөнәсәбәтле. *Терминологик һүҙлек.*

**ТЕРМИНОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.* ⟨ *гр.*] *и.* Айырым эш, белем өлкәһендә кулланылған терминдар йыйымы. *Медицина терминологияһы. Физик терминология.*

**ТЕРМИ́Т** [1] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Төрлө формалары ҙур ояларҙа (ер өҫтөндә лә, ер аҫтында ла) ҙур иләү булып йәшәгән һәм үҙағастың короткостары һаналған эҫе як бөжәктәре төркөмө.

**ТЕРМИ́Т** [2] [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Алюмин менән тимер әсемәһе катнашкан онтак (янғанда юғары эҫелек бирә). *Термит снаряды.*

**ТЕРМО́МЕТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Температураны үлсәү приборы. *Медицина термометры. Терегөмөшлө термометр.* ■ *Аяк аҫтында кар кумер кеүек шыгырлай. Аптека тәҙрәһенә куйылган ҙур термометр утыҙ биш градусты күрһәтә.* Х. Мохтар.

**ТЕ́РМОС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Эсендәге нәмәне эҫе йәки һалкын көйө һаклай торған махсус һауыт. *Аш термосы.* ■ *Яубатыров менән Саян акланда кырын ятып, термостан кайнар сәй эсергә кереште.* Р. Низамов.

**ТЕРМОСТА́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Эсендә даими температура һаклана торған прибор. *Һауа термостаты.*

**ТЕРМОЯДРО** [*рус.* термоядерный]: **термоядро реакцияһы** бик юғары эҫелектә еңел атом ядроларының ауырырак ядроларға берләшеүенән ғибәрәт булып, бик күп энергия сығара торған реакция. **Термоядро коралы** термоядро реакцияһын файҙаланыу нигеҙендә шартлай торған корал (ракета, бомба).

**ТЕРНӘКЛЕ** *с. диал.* Тернәксел.

**ТЕРНӘКЛӘҮ** *к.* Тырышып йүнләү. *Тернәкләп тапкан малың юкка сыккас, әрнейһең инде.* С. Агиш.

**ТЕРНӘКСЕЛ** *с.* Тырышып йүнләүсән; йүнсел.

● *Тернәксел кеше ат тиҙәген алтын итер.* Әйтем.

**ТЕРПЕ** *и.* **1.** Һырты энә менән капланған бәләкәй йәнлек. **Колаклы терпе** ҙур колаклы сүл терпеһе.

**2.** Инәһен имеп йөрөгән башмак моронона кейҙерә торған сәнскәкле морондок.

**ТЕРПЕЛӘНЕҮ** *к.* Йүнләп һөйләшмәй, тырҫ-мырҫ килеү.

**ТЕРПӘК** *с. диал.* Йөрөшһөҙ. *Терпәк ат.*

**ТЕРРА́РИУМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Һөйрәлеүсе һәм ер-һыу йәнлектәрен тота торған бина.

**ТЕРРА́СА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Кыйыклап яһаған йәйге асык төкәтмә. *Улар [кыҙҙар] .. йорттоң өҫкө катындагы ҙур террасага сыгып, .. мандолинага кушылап йырлап ултыра.* Ғ. Хәйри.

**2.** *кар.* Тау киртләсе, һикәлтәһе.

**ТЕРРИТОРИАЛЬ** [*рус.* территориальный] *с.* Территорияға мөнәсәбәтле. *Территориаль диалект. Территораль сик.*

**ТЕРРИТО́РИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Билдәле бер сиге булған ер майҙаны; ер. *Дәүләт территорияһы. Колхоз территорияһы. Завод территорияһы.* ■ *Башкортостаныдың территорияһы Чехо-*

*словакия һәм Болгария кеүек илдәрҙең территорияһынан .. байтаҡ ҙур.* М. Хисмәтов.

**ТЕРРО́Р** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Әҙәрлекләү, үлтереү юлы менән политик дошмандарҙы ҡурҡытыу, баҫтырыу политикаһы. ***Фашистик террор.*** *Террор үткәреү.*

**ТЕРРОРИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Террор политикаһы һәм тактикаһы. *Хәрби терроризм. Терроризм идеяһы.*

**ТЕРРОРИ́СТ** [*рус.*] *и.* Террор яҡлы, террорға ҡатнашлы кеше. *Террористар төркөмө.*

**ТЕРРОРИСТИК** *с.* Террорға мөнәсәбәтле. *Террористик ойошма. Террористик эш.*

**ТЕРСӘ** *с. диал.* Теремек.

**ТЕРТ** *оҡш.* Ҡапыл һелкенгән хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Тәнзилә әбей .. ҡороған ағас ботаҡтарына шартлата баҫып ебәрһә, Сәгиҙә терт итеп ҡала.* М. Тажи.

**ТЕРТЕЛДӘК** *и. һөйл.* Баш, тояҡтан бешереп, һыуытылған ашамлыҡ.

**ТЕРТЕЛДӘҮ** *ҡ.* Терт-терт итеү, терт-терт килеү. ***Фабрика торбаһынан сыҡҡан пар көсөнөң*** *тауышына .. турысай тертелдәп, тәндәре ҡалтырап, ҡасырға уйлаһа ла Мөлөк ағай уны ныҡтып тотҡан, ебәрмәй.* Т. Хәйбуллин.

**ТЕРТЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **тертләү**. *Ҡапыл килгән был хәбәр Зилскийҙе тертләтеп ебәрҙе.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТЕРТЛӘҮ** *ҡ.* Ҡурҡып, терт итеү. *Төн уртаһы ауғас, Үмәр ҡарттың тәҙрәһен иплән кенә сиртеләр. Ул тертләп китте.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡоралайҙар мине күрмәһә лә, ниҙер һиҙҙе булһа кәрәк, тертләп, урындарынан ҡуҙғалып ҡуйҙылар.* С. Кулибай.

**ТЕРТ-ТЕРТ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат терт иткән хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Терт-терт баҫыу.* ■ *Таҙ йөрәге торҙо биш көн һуғып, терт-терт итеп.* Ш. Бабич.

**ТЕРТӘЙЕҮ** *ҡ.* Йомро ғына булып төп-төҙ ҡалҡыу; тупайыу. *Тертәйеп торған түш.*

**ТЕРТӘЙТЕҮ** *ҡ.* Йомро ғына итеп төп-төҙ ҡалҡытыу; тупайтыу.

**ТЕРТӘНЛӘК** *с.* Тик тормай, тегендә, бында тығылып, әләгеп, һуғылып барыусан. *Тертәнләк бала.*

**ТЕРТӘНЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Әләгә, һуғыла терт-терт йөрөү.

**2.** Хәлһеҙ генә булып, әләгеп, йығылып барыу. *Сәмиғулла өй башынан уның [Әхтәри ҡарттың] таяҡ таянып, тертәнләп ҡайтып килгәнен күрҙе.* Ж. Кейекбаев.

**ТЕРҺӘЙЕҮ** *ҡ. ҡар.* **тертәйеү**.

**ТЕРҺӘК** *и.* **1.** Беләктең быуынланып, арҡа сыҡҡан ере. *Терһәк быуыны. Терһәк һөйәге. Терһәккә таяныу. Терһәк менән төртөү. Терһәкте сәнсеп ултырыу.* / Еңдең шул тәңгәлдәге өлөшө. *Өҫтөмә, әрһеҙгә тип, ең остары, терһәге иҙрәй башлаған пинжәк .. кейеп алдым.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *диал. ҡар.* **терәк** 2. *Уҡытыусы .. уларҙы терһәкле бесән санаһына ултырып, .. балалар йортона алып бара.* Ғ. Шәрипов.

♦ **Терһәкте тешләрҙәй булыу** ҡылған эшкә ныҡ үкенеү. *Терһәкте тешләрҙәй булып, үкенеүҙәрем эҙ булманы.* А. Игебаев.

**ТЕРҺӘКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Терһәк менән таяныу. *Ул [Тимер] өҫтәлгә терһәкләнеп .. тағы китабына ҡапланды.* Б. Бикбай.

**ТЕРҺӘКЛӘҮ** *ҡ. диал.* Терәкләү. *Сананы терһәкләү.*

**ТЕРҺӘКСӘ** *и.* Еңдең терһәгенә ҡатлап һалынған нәмә.

**ТЕРӘК** *и.* **1.** Аумаһын, төшмәһен өсөн бер нәмәне терәтеп йәки күтәртеп ҡуйған нәмә; терәү.— *Сәйетҡол ағай, һин тороп тор, мин алғараҡ барып ҡарайым әле,— тип, [Айбулат] ҡайҙа йөктәр өҫтөнән, ҡайҙа күпер терәге эргәләп, алға табан китте.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Сананың ике яҡтан ҡуйылған ян ағасы. *Сана терәге. Санаға терәк ҡуйыу.* ■ *Тимерле лә сана терәкле, совет халҡы арыҫлан йөрәкле* (Халыҡ йырынан).

**3.** (*йәки* **арҡа терәге**) *күсм.* Ярҙам итерлек, таянып эш итерлек кеше йәки бер нәмә; таяныс. *Ҡайҙа ғына барһаң, дуҫ-иш кәрәк, дуҫ-иш икән донъя терәге* (Халыҡ йырынан).

**4.** *с. мәғ.* Эште башлау һәм алып барыу өсөн төп сығанаҡ, төп нигеҙ сифатындағы. *Терәк база. Терәк мәктәп. Терәк пункт.*

♦ **Күҙ терәге** ышаныр, ҡарап торған кеше.

**ТЕРӘКЛӘҮ** *ҡ.* Терәк (2 мәғ.) ҡуйыу, терәкле итеү. *Сананы терәкләү.*

**ТЕРӘКТӘШ** *и.* Үҙ-ара терәк, ярҙамсы булған кешеләр (бер-береһенә ҡарата). // *Терәктәш кеше.* ■ *[Нигмәтулла:] Беҙ, ағай, бер-беребеҙгә күптән терәктәш була торған кешеләр.* Я. Хамматов.

**ТЕРӘЛДЕРЕҮ** *ҡ.* Бик яҡын килтереү; терәтеү. *Терәлдереп ҡуйыу. Терәлдереп ултырыу.*

**ТЕРӘЛЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **терәү** [1]. *Ҡаҙыҡ менән терәлгән ҡойма.*

**2.** Арҡаны, яурынды терәү; һөйәнеү. *Терәлеп тороу. Терәлеп ултырыу.* ■ *Әсә .. ҡапҡа бағанаһына .. терәлеп, башын түбән эйҙе.* Б. Бикбай.

**3.** Ара ҡалмаҫлыҡ итеп яҡын килеү, тейеү. *Өйгә терәлгән һарай. Терәлеп килеп ултырыу. Урман ауылға терәлеп тора.*

**4.** Килеп төртөлөү. *[Арба] бер бағанаға терәлеп туҡтаны.* М. Тажи. / *күсм.* Ниндәйҙер шартҡа, хәлгә, сиккә килеү; төкәлеү. *Көлкө менән башланған һүҙҙәрҙең аҙағы һуғышҡа килеп терәлә.* Д. Юлтый. *Нимә генә эшләргә теләмә, шул атҡа барып терәлә.* М. Ғафури.

♦ **Кәмә ҡомға терәлеү** *ҡар.* **кәмә**.

**ТЕРӘЛЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **терәлеү** 3. *Терәлешеп ултырыу.*

**ТЕРӘП** *бәйл. диал.* Алып, башлап; бире. *Шул урынды тауҙан терәп быуғанда, һыу инергә быуа тигән урын булыр ине.* М. Тажи.

**ТЕРӘПЕС** *с. диал.* Еңмеш.

**ТЕРӘТЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **терәтеү**. *Һайғау менән терәтелгән был клубты күреп, Кәримдең эсе бошто.* Я. Хамматов.

**ТЕРӘТЕҮ** *ҡ.* **1.** Аумаһын йәки төшмәһен өсөн бер нәмә менән таяу; терәү. *[Хисам:] Анауы ҡарағайҙы берәр нәмә менән терәтеп ҡиләйем, йәшен һуғып, ҡолап ҡуймаһын.* М. Тажи. *[Айнурҙың] уйы бағананы төҙәйтеп ултыртып, уны*

*терәткәс, коймаларҙы үҙ урынына рәтләп һалып ҡуйыу ине.* Н. Мусин.

**2.** Ара ҡалдырмай яҡын килтереү; төкәтеү, тейҙереү. *Улар һыйыр аҙбарының арғы башына терәтеп һалынған мунса һымаҡ бер генә тәҙрәле ҡураға инде.* Р. Ғабдрахманов.

♦ **Кәкре ҡайынға терәтеү** алдау, һемәйтеү. *[Мозой:] Әпкәләй ауыҙына ҡарап торһағыҙ, ул һеҙҙе кәкре ҡайынға терәтер әле.* Д. Юлтый.

**ТЕРӘҮ** [1] *ҡ.* **1.** Аумаһын йәки төшмәһен өсөн бер нәмә менән таяу; терәтеү. *Ҡапҡаны терәп ҡуйыу. Ҡойманы терәү.* / *күсм.* Терәк, таяныс булыу. *[Заятүләк:] Уң яғымдан терәргә Балҡан тауым бар минең, һул яғымдан терәргә Һыуһылым бар минең.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** Үрге осон нимәгәләр ҡуйып, ауыш хәлдә баҫтырыу; һөйәү. *[Шафиҡ] ҡайынға иҫке кәбән тағандарын терәне, өҫтөн япраҡлы ботаҡтар менән ҡаплап ҡыуыш эшләне.* Я. Хамматов. / Аушайып, арҡаны, яурынды нимәгәләр ҡуйыу. *Яурынды ҡоймаға терәү.* ■ *Ныязғол түрҙәге яҫтыҡҡа һыҙыла биреп, арҡа терәп, аяҡ һоноп ултырҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Ниҙең дә булһа бер яғын ныҡ итеп, ҡуҙғалмаҫлыҡ итеп ҡуйыу. *Аяҡты терәү.* ■ *Сейәбикә .. ҡолғаһын ала һалып, төбөн урындыҡ ҡаҙнаһына терәп, үрге осон түбә таҡтаға таҡаланы.* Т. Хәйбуллин.

**4.** Ара ҡалдырмай яҡын килтереү; тейҙереү. *Арҡаны терәп ятыу.* ■ *Сынбулатов .. йоҙроғон Әптерәйҙең танауына терәне.* М. Тажи. *Өйгә терәп ҙур-ҙур келәттәр һалынған* (Әкиәттән).

**5.** Килтереп төртөлдөрөү, килтереп еткереү. *[Тәнзилә:] Ошо юл ҡайҙа булһа ла апарып терәр әле.* М. Тажи.

**6.** *күсм.* Ниндәйҙер шартҡа, хәлгә, сиккә килтереү. *[Миңлекамал:] Колхозды ла илтеп терәй, үҙенең дә башына етә ул [Мөжипов].* Д. Исламов. *Маусуфа еңгә үҙенең тереклеген рәхимһеҙ ҡышҡа килтереп терәне.* К. Туйкин.

♦ **Арҡа терәү** *ҡар.* **арҡа. Арҡаны ныҡҡа терәү** *ҡар.* **арҡа. Аяҡ терәп [һөйләшеү]** *ҡар.* **аяҡ** [1]**. Күҙ терәү** *ҡар.* **күҙ.**

**ТЕРӘҮ** [2] *и.* Аумаһын, төшмәһен өсөн таяған нәмә; таяу. *[Мейес] алға табан бер аҙ ҡыйшайғас, емерелеп китмәһен өсөн ике ҡайын терәү менән терәп ҡуйғандар.* М. Ғафури. *Сәфәр .. ишеккә тыштан көрәк һабы менән терәү һалды ла урамға сыҡты.* С. Агиш.

**ТЕРӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **терәү** [1] 1, 2. *Майҙанда тик көрәшселәр, .. иңдәр иңгә терәште.* Р. Бикбаев.

**ТЕТ: тет итеп** эҙләү тотош аҡтарып, тетеп эҙләү. *Батшаның уландары, ҡыҙҙары юғалған апаларын тет итеп эҙләп, таба алмаған* (Әкиәттән).

**ТЕТЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **тетеү** 1, 2. *Тетелгән йөн.* ■ *Снарядтар беҙҙән дүрт-биш саҡрым уҙып төшөп, һауаға көслө ҡойондар аҡтара. Крепостар, йөн кеүек тетелеп, һауаға күтәрелә.* Д. Юлтый. *Түр яҡ һикегә тетелеп бөткән сепрәк палаҫ түшәп ҡуйылған.* Б. Бикбай.

**ТЕТЕМ** *и.* Күпмелер ултырып тетерлек күләм. *Бер тетем йөн. Өс тетем йүкә.*

**ТЕТЕҮ** *ҡ.* **1.** Тартып-тартып, берәмекләп, буй-буй айырыу. *Йыуғыска йүкә тетеү.* ■ *Сайырға ҡатып ойошҡан йөндө тартып-һуҙып тетә-тетә Емештең .. бармаҡтары талып, һыҙлап бөттө.* З. Биишева.

**2.** Киҫәк-киҫәк, өлөш-өлөшкә өҙгөләү. *Эт абалап Сәхи менән Юлай өҫтөнә ташланды. Унһыҙ ҙа йыртыҡ кейемдәрен тамам тетеп бөтә ине, ярай әле ап-аҡ ебәктән генә күбәләк кеүек итеп кейенгән ҡыҙ осоп араға керҙе.* И. Ғиззәтуллин. *Ерҙе тетте ҡуйы ҡара бомба, снаряд ямғыры.* Х. Кәрим.

**3.** *күсм.* Туҙҙырып, ныҡ итеп әйтеү; пыр туҙҙырыу. *Тетеп ташлау. Тетеп әрләү.* ■ *Башҡа эшселәр ҙә сығып, администрацияны, профсоюзды тетеп һалды.* Х. Мохтар. *Беҙ, мәктәптә учком доклады булғанда, нисек тетә торғайныҡ. Унда һөйләргә генә табыла.* С. Агиш. *Айыу йомғаҡлау һүҙендә тетеп һалды Үгеҙҙе.* С. Кулибай.

**4.** *күсм.* Бик шәп, ҡыҙыу эш итеү; эшен килтереү. *Тетеп донъя көтөү. Тетеп яуыу. Тетеп эшләп ташлау.* ■ *Ҡул йыуылды. Бишбармаҡ килтерелде. Инспектор ҙа, юлда килеп ҡорһағы бушағанлыҡтан, тетеп һалды.* Т. Йәнәби. / Берәүҙең бер эшен оҡшатмағанда мыҫҡыллап әйтелә. *[Ямал:] Ул егеттәрҙе ниңә аҙыраҡ күңелһетеп ебәрмәйһегеҙ? [Зәйнәп:] Әле лә әйбәт оҙатабыҙ бит. [Ямал:] Һарап инде, тетәһегеҙ.* Н. Кәрип. *[Атаһы — Әминбәккә:] Теткәнһең икән, улым! Сатраш та булдымы һөнәр* (Әкиәттән). **Тетмәһен (***йәки* **тетмәкәйен) тетеү** 1) ныҡ ҡыҙҙырып, туҙҙырып әйтеү. *[Мәрхәбә:] Анау ваҡыт уйнап ҡына һөйләгәнде .. ышанырлыҡ итеп яҙып сыҡтығыҙ бит. Шуның өсөн Әфләтүн ағайығыҙ тетмәмде тетте.* М. Тажи; 2) ныҡ ҡыҙыу, шәп эш итеү; эшен килтереү. *Эштең тетмәһен тетеү.* ■ *Ир-егеттәр күбәләрҙең тетә тетмәһен.* Й. Солтанов.

**5.** *күсм.* Тотош ҡыҙырыу, тотош аҡтарыу. *Тетеп эҙләү.* ■ *[Ярулла:] Эҙләмәгән ерҙе ҡалдырманым. Әрәмәлекте буйҙан-буйға тетеп сыҡтым, әллә ҡайҙа саҡлы барҙым.* Ш. Насыров.

**ТЕТЕШЕҮ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **тетеү** 1. *Йөн тетешеү.*

**ТЕТКЕЛӘҮ** *ҡ. көс. ҡар.* **тетеү** 1—3. *Йүкәне теткеләү.* ■ *Беҙҙең өҫкә ҡапыл ябырылып, теткеләргә әҙер торалар.* Т. Йәнәби. *Ҡайһы саҡта һин яғымлы, теткеләп тә ҡуйғаның бар.* Н. Нәжми.

**ТЕТКЕС** *и. диал.* Йөн тетә торған ҡорал; ян.

**ТЕТРӘНДЕРЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **тетрәнеү.**

**ТЕТРӘНЕҮ** *ҡ.* Эстән тетрәү; ҡалтыраныу. *Лениндың вафат булыуын ишеткәс, тимерсе тетрәнеп, ҡайғынан ҡара көйөп, йүгереп өйөнә ҡайта.* Х. Ғиләжев.

**ТЕТРӘТЕҮ** *ҡ.* **1.** Киҫкен хәрәкәттәр менән дерелдәтеп һелкетеү, сайҡалғандай итеү (ҙур, массив нәмәләрҙе). *Күк күкрәтеп, ер тетрәтеп, йәшен сатырлатып үпте тау битен.* Н. Нәжми. *Тау-таштарҙы тетрәтеп, ҡош-ҡорттарҙы өркөтөп, балыҡтарҙы ҡурҡытып, Шүлгән күле төбөнән Һәүбән донъяға сыҡҡан.* «Аҡбуҙат».

**2.** *күсм.* Көслө ваҡиғалар менән дер һелкетеү, ҡурҡыу һалыу. *Фәрехшат Уйылдановтың донъя тетрәтеп, колхоз председателе булып эшләгән*

*сағы ине әле.* Ш. Насыров. *Тыңлаған ул [Пушкин] ил тетрәткән Пугач яуҙарын.* М. Хәй.

**3.** *күсм.* Нык тәьҫирләндереү, көслө тойғо, хис көҙғатыу. *Күңелде тетрәтеү.* ■ *Миңнегәлиҙең үле хәбәре уны [Котлогужа картты] тетрәтте. Үлемдең иң куркыныcы шул — был кеше кабат булмаясак.* Р. Солтангәрәев.

**ТЕТРӘТКЕС** *с.* **1.** Тетрәү (1 мәғ.) уятҡан, тетрәтә торған. *Ер аҫты көстәре тетрәткес кеүәт менән был катламдарға кыҫым яһай.* Д. Буракаев.

**2.** *күсм.* Күңелгә бик көслө һ. б. шундай тәьҫир итә торған. *Кузнецовты елтерәтеп, муйынына элмәк кейҙерҙеләр ҙә аяғы аҫтындағы бүкәнде ауҙарҙылар. Тетрәткес, кот оскос күренеште күҙәткән Касьянов үҙе лә аңғармаҫтан кыскырып ебәрҙе: — Туктатығыҙ!* Я. Хамматов.

**ТЕТРӘҮ** *к.* **1.** Киҫкен хәрәкәттәр менән нык һелкенеү, сайкалғандай булыу (ҙур, массив нәмәләргә карата). *Ер тетрәй.* ■ *Тауҙар тетрәй, туптар ярыла, таштар актарыла гөр итеп.* Р. Ниғмәти. *Дауылланып, күкрәп болот килде, тетрәп торҙо дала буйҙары.* М. Кәрим. / Дер-дер һелкенеү; дерелдәү, калтырау. *Гүйә был пар еләк үҙе ине тетрәп торған һинең иренең.* Р. Ғарипов.

**2.** *күсм.* Күмәк халык катнашкан көслө вакиғанан дер һелкенеү. *Тәүге тапкыр донъя тетрәгәндә әле алыҫ ерҙә, тегендә, коммунизм өсөн канга баттың Мадрид капкаһының төбөндә.* М. Кәрим.

**3.** *күсм.* Нык тәьҫирләнеү, көслө һ. б. төрлө тойғо, хис кисереү. *Ауыр хәбәрҙән тетрәү.* ■ *Шундай бер йыр йырлармын, кыҙҙарҙың йәне тетрәр.* Р. Шәкүр.

**4.** *күсм. кар.* **калтырау** 2. *Шунда күптәр тетрәне куркып, шашып.* Ш. Бабич.

**ТЕТРӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **тетрәү** 3, 4.

**ТЕТТЕРЕҮ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **тетеү** 1. *Йөн теттереү.*

**2.** *күсм.* Шәп итеү; гөрләтеү. *Теттереп донъя көтөү. Теттереп йырлау. Теттереп йәшәү.* ■ *[Заир мулланың] малайы .. һалдаттан калды ла теттереп кыҙыл мал менән һатыу итә.* А. Карнай. *Ауылда сакта быларҙың туры аттары ла шәп ине. Эштән кайткан вакытта Гәрәйҙәрҙе, түбән ос Хәкимдәрҙе теттереп уҙып китә торғандар ине.* М. Ғафури.

**3.** *күсм.* Кәйеф-сафа короу, күңел асыу. *Еҙнәм килгән икән дә, якшы булған көткәндә, уйнап-көлөп, бүләк алып, теттерәбеҙ икән дә* (Туй йырынан).

**ТЕТӘКӘЙЛӘҮ** *к. диал.* Ентекләү, бөтмөрләү. *Тетәкәйләп эшләү.*

**ТЕҮЕШ** *окш.* Кор кыскырған тауышты белдергән һүҙ. *Теүеш итеү.*

**ТЕҮЕШЛӘҮ** *к.* Теүеш-теүеш итеү. *Кор теүешләй.*

**ТЕҮЕШ-ТЕҮЕШ** *окш.* Кабат-кабат теүеш иткән тауышты белдергән һүҙ. *Теүеш-теүеш итеү. Теүеш-теүеш килеү.*

**ТЕҮӘ(Й)** *р. иҫк. кар.* **теүәл** 1, 2.

◆ **Теүәй яланғас** *диал.* **сыр яланғас** (*кар.* **сыр** [3]).

**ТЕҮӘЛ** *р.* **1.** Һан яғынан тулы, иҫәбе тулы. *Теүәл алтмыш йәш. Теүәл бер аҙна. Сәғәт теүәл бер.* ■ *Ул Йосопто теүәл бер йыл көттө, тик ниңәлер Йосоп кайтманы.* Р. Ниғмәти. *Бер крәҫтиән сауҙагәрҙең юғалткан ете йөҙ һум аксаһын табып, теүәл көйө үҙенә килтереп бирҙе, ти* (Экиәттән).

**2.** Бөтөн бер иҫәпкә килешле; парлы, ишле. *Бер теүәл. Ике теүәл.* ■ *Алтмыш теүәл өйөр килә, алтмыш теүәлдең эсендә алма сыбар дунән килә.* «Кара юрға».

**3.** *хәб. функцияһында* Бөтә яктан килешле; етеш, бөтөн. *Күңеле теүәл.* ■ *Уның [Котлоярҙың] донъяһы теүәл: байлык якшы, тамак тук, өҫ бөтөн.* Һ. Дәүләтшина.

● *Иҫәпһеҙҙең куйы теүәл.* Әйтем. *Йөҙ йәшәмәһен, теүәл йәшәһен.* Әйтем.

**ТЕҮӘЛЛЕК** *и.* Бөтә яктан килешле булыу сифаты, ниҙе лә булһа вакытында йәки еренә еткереп үтәү сифаты. *Өйрәнсек үҙ эшен сәғәт теүәллегендә башкара.* З. Биишева. *Ул [Рахман] һәр эштә теүәллекте ярата.* Ә. Вәли.

**ТЕҮӘЛЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Һан яғынан тулыланыу; теүәлгә әйләнеү, теүәл булыу. *Юғалған башмактар табылды, мал теүәлләнде.*

**2.** Күләм яғынан теүәл хәлгә килеү; тамамланыу. *Эш теүәлләнә.*

**3.** Бөтә яктан килешле, етешкә әйләнеү; етеш булыу. *Иҫереп, донъяһы теүәлләнеп алған берәү .. һөрәнләп кайтып бара.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТЕҮӘЛЛӘҮ** *к.* **1.** Һан яғынан тулылығын, теүәл булыуын тикшереү. *[Фәзимә:] Калак-малакты теүәлләнем, урлап тыккандыр әле.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Күләм яғынан теүәл хәлгә килтереү; тамамлау. *Эште теүәлләү. Һүҙҙе теүәлләү.* ■ *Үткән көҙ уракты теүәлләгәс, колхоз мине курортка ебәрҙе.* Д. Исламов.

**3.** Бөтә яктан килешле, етеш итеү. *Донъяны теүәлләп алыу.*

**ТЕҮӘНЕҮ** *к.* Кәмеп, юкка сығыу; бөтөү. *Кәмемәйһең, Уралым, теүәнмәйһең, тапаһа ла һине күп ирҙәр* (Халык йырынан).

**ТЕҮӘСӘЙ** *и. кар.* **түбәсәй.**

**ТЕҮӘТӘЙ** *и. кар.* **түбәтәй** [1].

**ТЕ́ХНИК** [*рус.*] *и.* Техника буйынса урта белем алып, шул өлкәлә эшләгән кеше. *Сәйҙел һала завод нигеҙен, техник булып корпус төҙөшә.* Ғ. Сәләм.

◆ **Теш техникы** теш протезы яһау оҫтаһы.

**ТЕХНИ́К** *с.* **1.** Техникаға мөнәсәбәтле. *Техник база. Техник прогресс. Малсылыктың техник кимәлен күтәреү.* / Техниканы өйрәнеү йәки техника өлкәһендә эшләүгә бәйле. *Техник фәндәр. Йәштәргә техник белем биреү.*

**2.** Машина һәм механизмдар эшенә, ниҙер эшләү процесына мөнәсәбәтле. *Станоктың техник мөмкинлеге. Техник контроль. Техник талап. Техник хәүефһеҙлек саралары күреү.* / Техниканы хеҙмәтләндереүгә мөнәсәбәтле. *Техник кәңәш. Техник хеҙмәт.*

**3.** Промышленноста файҙаланыу йәки эшкәртеүгә тәғәйенле. *Техник быяла. Техник май.* ■ *Техник культуралар ҙан шәкәр сөгөлдөрө, көнбағыш, мәк үҫтерелә.* М. Хисмәтов.

**4.** Профессиональ эш алымына мөнәсәбәтле.

*Техник алым. Техник башкарылыш. Техник күнекмә.*

**5.** Ярҙамсы эштәрҙе башҡарыуға мөнәсәбәтле. *Техник хеҙмәткәр. Техник секретарь.*

◆ **Техник редактор** баҫыласаҡ китап йәки газета-журналдың полиграфик эшләнешен күҙәткән редактор.

**ТЕ́ХНИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Ижтимағи хеҙмәттә ҡулланылған төрлө эш ҡоралы, саралары, шулай уҡ кеше эшмәкәрлегенең уларҙы яһау, ҡулланыу һәм камиллаштырыу менән бәйле өлкәһе. *Алдынғы техника. Техника тарихы. Техника үҫеше. Фән һәм техника ҡаҙаныштары.* ■ *— Уйлап ҡараһаң, кеше үҙенең аҡылы менән барлыҡҡа килтергән техниканан файҙа күрә. Бына беҙ ошо поезд менән күпме оҙон юлды ҡыҫҡарттыҡ, күпме ауырлыҡты еңеләйттек.* Д. Юлтый. / Теге йәки был төрҙәге эш сараһын һәм ҡоралын ҡулланыу тармағы. *Реактив техника. Хәрби техника. Атом техникаһы. Ауыл хужалығы техникаһы. Төҙөлөш техникаһы.*

**2.** *йыйн.* Машиналар, механик ҡоралдар, ҡоролмалар. *Техниканы һаҡлау. Яңы техника.*

**3.** Берәй эштә, спортта, сәнғәттә файҙаланылған алым. *Музыкаль техника. Һикереү техникаһы. Шахмат уйнау техникаһы.* / Шундай алымдарға эйә булыу, берәй эштәге оҫталыҡ. *Дирижёрлыҡ техникаһы. Һүрәт төшөрөү техникаһы.*

◆ **Хәүефһеҙлек техникаһы** хеҙмәт шарттарының хәүефһеҙлеген тәьмин иткән төрлө сара һәм алымдар системаһы.

**ТЕ́ХНИКУМ** [*рус.*] *и.* Урта техник йәки ғөмүмән махсус уҡыу йорто. *Ауыл хужалығы техникумы. Нефть техникумы. Төҙөлөш техникумы. Техникумда уҡыу.*

**ТЕХНО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Билдәле бер эш тармағының технологияһы буйынса белгес. *Өлкән технолог. Инженер-технолог.*

**ТЕХНОЛОГИК** *с.* **1.** Технологияға мөнәсәбәтле. *Технологик белем. Технологик талап.* / Технологтар әҙерләүгә мөнәсәбәтле. *Технологик институт.*

**2.** Билдәле бер технология буйынса эшләү һәм эшкәртеүгә мөнәсәбәтле. *Технологик инструкция. Технологик процесс.*

**ТЕХНОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Төрлө нәмәне эшләү һәм эшкәртеү ысулдары тураһындағы белем.

**2.** Төрлө нәмәне эшләү һәм эшкәртеү процесындағы эш алымдары. *Машина деталдәрен эшләү технологияһы. Производство процесының технологияһын ентекләп эшләү.*

**ТЕШ**[1] *и.* **1.** Аҙыҡты әләктереү, ваҡлау һәм сәйнәү өсөн булған ауыҙ ҡыуышлығындағы һөйәк үҫенде, ағза. *Алғы теш. Аҫҡы теш. Өҫкө теш. Яңаҡ теше. Теш ҡаҙнаһы. Теш үңе. Теш порошогы. Теш щеткаһы. Һирәк теш. Эре теш. Теште дауалау. Теш сыға. Теш төшә. Теште һыҙыклау. Теш шығырлатыу.* **Ағыу теше** *ҡар.* **ағыу**[2] **1. Аҡыл теше** егерме йәштән үткәс кенә сыға торған иң төпкө теш. **Имсәк теше** баланың һуңынан төшә торған тәүге теше; сабый теш. **Ҡабан** (*йәки* **ҡаҙыҡ**) **теш** алғы теш менән яңаҡ тештәре араһындағы осло теш. **Сабый теш** *ҡар.* **имсәк теше. Теш ите** теш төбөндәге ит; сирса. **Тешәү** теш *ҡар.* **имсәк теше. Һөт теше** *ҡар.* **имсәк теше.**

**2.** Ҡорал-ҡорамалдың киртләсләнеп, осло булып сығып торған өлөшө. *Бысҡы теше. Тараҡ теше. Тирмән теше. Тырма теше. Ураҡ теше.* ■ *Экскаватор сүмесенең ҡорос тештәре туң ерҙе кимерә.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 14 март.

**3.** Бер яғы киртләсләп төшөрөлгән биҙәк. *Фариза .. ҡыҙыл бәрхәттән тешле уҡа баҫып теккән елән .. кейеп сыҡты.* һ. Дәүләтшина.

◆ **Тараҡ теш** сер тотмаған кешегә әйтелә. **Теш араһына ҡыҫтырыу** ашау. *Теш араһына ҡыҫтырырға булмағас, .. эшләге лә килмәй икән.* Ә. Бикчәнтәев. **Теш батыу** *ҡар.* **батыу. Теш бөркөү** теш сыҡҡанын белдереп, төкөрөк өрөү (йәш балаға ҡарата). **Тешеңде койормон** кешегә янап, ерләп әйтелә. *[Роберт — Хәбиргә:] Артыҡ һүҙ ыскындырһаң, тешеңде койормон!* Ғ. Байбурин. **Тешкә тейеү** тешсе сағылдырыу. *Беҙ Сәйле шишмәгә туҡтаныҡ. Уның һыуы .. һыуыҡ, тешкә тейә.* Р. Низамов. **Теш ҡайрау** үсләшеп, үс алырға ярһыу. *Синфи дошман тешен ҡайрай. Ул теләмәй ҡанһыҙ үлергә.* Ғ. Амантай. **Теш сығыу** бер төрлө эш буйынса күп тәжрибә туплау. *[Мотал:] Минең ошо малсылыҡ эшендә тешем сыҡкан. Ниндәй эшкә ҡасан тотонорға мин унан [Яппарҙан] яҡшыраҡ беләм.* М. Хәйҙәров. **Теш тешкә теймәү** ныҡ ҡалтырау. *Тәнем ут шикелле яна, тешем тешкә теймәй.* М. Тажи. **Теш төшкәнсә ҡуймау** оҙаҡ онотмай һөйләнеү. **Теш төшөү** бер нәмәгә көслө теләк белдереп, өҙлөкһөҙ шуны һөйләү. *[Мәхмүзә:] Байырға кәрәк, йәш бисә алам, тип, теше төштө инде уның.* Б. Бикбай. **Теш үтеү** кемгә йәки нимәгәлер көс етеү. *[Мәғәфүр:] Йәмәғәтселек инспекторы .. бәйләнеп ҡарағайны, теше үтмәне.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 12 сентябрь. **Теш һыуын һурыу** ас йәшәү, асығыу.

● *Суртан үҙе үлһә лә, теше үлмәй.* Әйтем.

**ТЕШ**[2] *и. диал. ҡар.* **һөйәк**[2]. *Сейә теше.*

**ТЕШЕ** *с.* Инә енесле. *Теше быҙау. Теше мал. Теше кеше.* ■ *Был донъя тип-тулы кеше, кеше иркәк, кеше теше* (Мөнәжәттән).

**ТЕШЕГЕҮ** (тешек*е*) *к.* **1.** Тешсе ҡыҫыу, тешләнеү. *[Тығыҙаҡтың] асыуы кәмеп, тешеккән тештәре яҙыла бара.* Т. Килмөхәмәтов. *Тешегеп йөрөп, тешем бөттө.*

**2.** Ауыҙҙан һүҙ сығармау; һөйләшмәү, өндәшмәү. *Тимер ҡырандастан ырғып төшөп ҡалды. Тешеккән был кеше менән юл буйы һөйләшмәй килеү уны туйҙырғайны.* Б. Бикбай.

**ТЕШЕКМӘ** *с.* Ауыҙынан һүҙ сығармаҫ, өндәшеп бармаған.

**ТЕШЕКӘЙ** *с. ҡар.* **теше.** *Тешекәй бәрәс.*

**ТЕШЕ-ТЫРНАҒЫ: теше-тырнағы менән** бар көскә. *[Докторҙар] балаларҙы йәшәтергә теше-тырнағы менән йәбешеп ята.* М. Тажи.

**ТЕШЛЕ** *с.* Һүҙгә үткер, һүҙгә уҫал. *Ай-һай, ҡарттар тешле була, .. елкәнең соҡор булғанын бер ҙә яратмай.* А. Игебаев.

**ТЕШЛӘКЛӘҮ** *к.* Төрлө ерҙән тешләү. *Мең төрлө себен, бөгәләк, күгәүен, серәкәйҙәр быҙылдашып, аттарҙың бауыр аҫтарынан, арҡаларынан, танау, күҙ тирәләренән .. тешләкләп кит[ә].* Ғ. Дәүләтшин.

**ТЕШЛӘМ** *и.* Тешләп ҡабырлыҡ киҫәк. *Бер тешләм икмәк.*

**ТЕШЛӘНЕҮ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **тешләү** 1. *Эттән тешләнеү.*

**2.** Теште ҡыҫыу. *Ул [Гөлйөҙөм] тешләнеп, ыңғырашмаҫҡа тырышып, күҙен йомдо.* Һ. Дәүләтшина. *[Сурагол:] Күп баш эйҙем, тешләнеп йөрөп, тешем ҡойолоп бөттө.* Т. Хәйбуллин.

**ТЕШЛӘНМӘ** *с. диал.* Тешекмә.

**ТЕШЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **тешләү** 1. *Эттән тешләтеү.*

**ТЕШЛӘҮ** *к.* **1.** Теште батыра ҡабып, яралау. *Тешләп алыу. Тешләп ҡанатыу.* ■ *[Ямал:] Йә быndараҡ, яҡынырак килеп баҫ инде. Ҡурҡма, тешләмәм.* М. Тажи. *[Ғәзимә:] Һеҙ ас бет кеүек әсе тешләйһегеҙ.* Һ. Дәүләтшина. / Теш менән ҡыҫыу. *Иренде тешләү. Тешләп өҙөү.* ■ *Бер йылан ҡойроғон тешләгән дә, йоҡлап ята икән, ти* (Әкиәттән). / Ҡаяу, морон менән яралау (бөжәктәргә ҡарата). *Себен тешләй. Серәкәй тешләй.* ■ *Төлкөнөң тәнен эре-эре ҡырмыҫҡалар һырып алған да күмәкләп тешләргә тотонған* (Әкиәттән).

**2.** Теш менән өҙөп ҡабыу. *Тешләп ашау.* ■ *Закир аҡ ҡаласты умыра тешләп, .. билмәнгә тотондо.* З. Биишева.

♦ **Терһәкте тешләрҙәй булыу** *ҡар.* **терһәк.**

● *Эт һимерһә, эйәһен тешләй.* Әйтем.

**ТЕШЛӘШЕҮ** *к.* **1.** *урт. ҡар.* **тешләү** 1.

**2.** *диал. ҡар.* **тешләү** 1. *Тешләшкән ат.*

● *Алыҫ булһа, кешнәшер, яҡын булһа, тешләшер.* Мәҡәл.

**ТЕШҺЕҘ** *с.* **1.** Теше юҡ. *Тешһеҙ ауыҙ.*

**2.** *күсм.* Һүҙгә йыуаш, йомшаҡ, яуапһыҙ. *Тешһеҙ кеше.*

**ТЕШӘЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **тешәү** [1]. *Тешәлмәгән ураҡ.*

**ТЕШӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **тешәү** [1]. *Тирмән ташын тешәтеү. Ураҡты тешәтеү.*

**ТЕШӘҮ** [1] *к.* Ҡорал, ҡорамалдың тешен яңыртып йүнәтеү. *Бысҡыны тешәү. Тирмән ташын тешәү.* ■ *[Ғатаулла:] Килтер әле, ҡыҙыйҙ, улайһа урағыңды, йөҙөн тешәп бирәйем.* Й. Солтанов.

**ТЕШӘҮ** [2] *к.* Теш алмаштырыу (балаларға, йәш малға ҡарата). *Рөстәм тешәй. Иҫке тештәр төшә лә төшә. Яңы тештәр шытып сығып үҫә лә үҫә.* Й. Гәрәй.

● *Етеҙ бала етегә еткәнсә тешәй.* Әйтем.

**ТЕШӘҮ** [3] *с.* Теш алмашыр йәштәге. *Тешәү мал. Тешәү йылҡы. Тешәү һарыҡ. Тешәү һыйыр.*

**ТЕШӘҮЕС** *и.* Тешәй торған ҡорал. *Слесарь буш торған усаҡтың утын дөрләтеп, һалҡын ҡоросто киҫеү өсөн тешәүесте ҡайһылай сыныҡтырырға өйрәтә башланы.* Й. Мостафин.

**ТИБЕКСӘ** *и. диал. ҡар.* **табалдырыҡ** 1.

**ТИБЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **тибеү.** *Ситкә тибелеү.*

**ТИБЕН** *и.* Йылҡының ҡыш көнө ҡарҙы тибеп утлаған ере. *Тибен малы. Тибендә йөрөү. Тибенгә сығарыу.* ■ *Үткән ҡыш ҡарҙың ҡалын булыуы сәбәпле йылҡы тибендән һөлдәһен генә алып сыҡты.* Ғ. Дәүләтшин. *Арҡа ғына ерҙә тибен тибә ҡыҙыл туры айғыр өйөрө* (Халыҡ йырынан).

**ТИБЕНГЕ** *и.* **1.** Ҡайһы бер ата ҡоштарҙың үксә өҫтөндә була торған оҙон үткер тырнаҡ; типке [3]. *Әтәстең тибенгеһе.*

**2.** Һыбай йөрөгәндә аттың ҡабырғаһына төртөп ҡыуыр өсөн итек үксәһенә ҡуйылған тимер. *Тибенгеле итек.*

**3.** Өҙәнге бауы аҫтынан эйәрҙең ҡапталына тағып, һалындырып ҡуйған бер ҡат ҡалын күн. *Туҡымдары ынйылы, тибенгеһе сәмсәле.* «Аҡбуҙат». *Менгән генә атым ай кир булыр, тибенгеһе уның да тир булыр* (Халыҡ йырынан).

**ТИБЕНГЕЛӘҮ** *к.* Ат ҡабырғаһына тибенге менән төртөү. *Менгән аты яҡшы булып сыҡты, .. тибенгеләгән саҡта тулҡынып-тулҡынап елә.* И. Көҫәпҡол. *Ҡола ат .. бер урында туҡтап ҡалды. Мин тибенгеләп тә, сыбыҡлап та атты .. ҡуҙғата алманым.* С. Кулибай.

**ТИБЕНЕҮ** *к.* **1.** Ҡабат-ҡабат тибеү, тибеп-тибеп алыу. *Зөлкәрнәйҙең .. һиҙгер аты тибенеп, бышҡырып ҡуйған.* Н. Иҙелбай. *Күк бейә .. тирәһенә һырлыҡҡан тай-тулаҡтың ҡайныһын тешләп, ҡайныһын тибенеп өркөттө лә урманға ҡарай елеп китте.* Й. Мостафин.

**2.** Тибеп-тибеп аяҡ аҫтын соҡоу; сапсыныу. *Бында үлән шәп. Турысай тибенеп-тибенеп ашай.* Б. Бикбай. *Баҡса артында бер әтәс менән бер тауыҡ тибенеп, ем сүпләп йөрөй, ти* (Әкиәттән).

**3.** *иҫк.* Һөжүм яһау. *Бабсаҡтың .. йәнә бер улы бар ине Шыҡманай атлы, [Ҡарағөлөмбәт] уға тибенде, ул ҡасты.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ТИБЕНЛЕК** *и. ҡар.* **тибен.**

**ТИБЕНЛӘҮ** *к.* Тибендә йөрөү. *Йылҡы ҡыш булһа, Яйыҡ аша сығып, киң далала тибенләй* (Әкиәттән).

**ТИБЕРСЕНЕҮ** *к. диал.* Тыпырсыныу. *Тиберсенгән, ҡыҫҡырған, һүгенгән Иҙрисовты бер минут эсендә ҡоралһыҙландырҙылар.* А. Карнай.

**ТИБЕҮ** (тип*е*) *к.* **1.** Аяҡ менән ҡапыл һелтәп һуғыу. *Ишекте тибеп асыу. Тибеп йығыу. Тибеп осороу. Тибенге менән тибеү.* ■ *Бай асыуланып, тегеә этте тибеп ебәрә, эт шыңшып өрә башлай* (Әкиәттән). / Аяҡ менән һуғып, ҡыуыу (уйында). *Туп тибеү.* ■ *Ялбыр ҡара малайҙар таҡыя тибеп, йүгереп уйнайҙар.* Ғ. Амантай.

**2.** Аяҡ менән тырнап ҡаҙыу; сапсыу. *Ем тибеү.* ■ *Тауыҡтар йүгерешеп йөрөп, ҡышҡы көлдәрҙе тибеп аунай.* Ғ. Дәүләтшин. *Елмерҙәкәй тауҙың көн битендә тибен генә тибә ҡара айғыр* (Халыҡ йырынан).

**3.** Шыҡыйып килеп тотоу (йыртҡыс ҡошҡа ҡарата). *Байбисә барып етергә лә өлгөрмәй, кәртә буйында ҡорҡолдап йөрөгән тауығының себешен төйлөгән тибә лә ҡайҡалап һауаға күтәрелә.* Я. Хамматов. *Ҡарсыға ла сөйҙөм өйрәккә, тибә алмай төштө тирәккә* (Халыҡ йырынан).

**4.** Көс менән әтеү. *Күнәктең төбөн боҙ тибә. Мылтыҡ тибә. Тулҡын тибә.* ■ *Мөгөҙ йәйә типкән һыҙма уҡтар һыҙғырып, көйләп, шыйлап уҙғандар.* Б. Вәлит. / Һулҡ-һулҡ итеп ҡағыу (йөрәккә, тамырға ҡарата). *Дөпөлдәп тибеү. Йыш-йыш тибеү. Ҡан тамыры тибә.* ■ *Таңатарҙың йөрәге сығырҙай булып типкән.* Ә. Вахитов.

*Ошо ҡулдар бойҙай башағында һут типкәнен тоя һулҡылдап.* Р. Бикбаев.

**5.** Ниҙеңдер эсенән тышҡа бәреү. *Яранан ҡан тибеп сыға. Тир тибеп сыға.* ■ *Ҡарар күҙгә әммә күренмәйҙер ер ҡуйынынан шишмә типкәне.* Ә. Таһирова. / Өҫкә ҡалҡыу, ҡалҡып сығыу. *Биткә миң тибә. Мыйыҡ тибә.* ■ *Бешеп килгән алмаларға алһыу типкән төҫлө йөҙҙәрең.* «Юлай менән Салауат».

**6.** *күсм.* Үҙ итмәй, ҡағытыу; ҡағыу. *Мин дә кеше, ҡаҡма һәм типмә, ҡотто алма, йәме, Йәнбикә!* С. Кулибай. *Көтөү типкән мал булһа, уны сайҙа бүре алыр* (Ҡобайырҙан).

**7.** *күсм.* Сәлдереү, урлау. *[Рәхимйән:] Ул бер ваҡыт баҙарҙа минең ҡарсыҡтың быймаһын тибеп тайған.* Н. Иҙелбай.

♦ **Аяҡ тибеү** *кар.* **аяҡ. Башҡа тай типмәгән** (*йәки* **типкәнме ни**) *кар.* **баш. Донъяның артына тибеп йәшәү** рәхәт, ҡайғыһыҙ йәшәү. **Йөн тибеү** *кар.* **тиҙәк тибеү. Оя тибеү** төйәк ҡороу. *Оя тибеп, көн итеп ятҡан булабыҙ әле шунда.* М. Тажи. **Ситкә тибеү** *шул уҡ* **ситкә ҡағыу 1** (*кар.* **сит**[1]). **Тиҙәк тибеү** эшһеҙ, буш көн үткәреү. *Тиҙәк тибеп йөрөү.* **Тәртәгә тибеү** ахмаҡлыҡ эшләү.

● *Бейә колонон типһә лә биртә типмәҫ.* Әйтем.

**ТИБЕШ**[1] *и.* Йөрәк, тамырҙың тибеүе. *Тамыр тибеше.* ■ *Йөрәгемдең һәр бер тибешендә ишетәм мин Урал тауышын.* А. Игебаев.

♦ **Ҡан тибеше** *кар.* **ҡан** 1.

**ТИБЕШ**[2] *с.* Ыңғайлы, көйлө; шәп. *Тибеш салғы. // Тибеш эшләү.* ■ *Ай-һай, был егеттәр тибеш күренә, ҡайһылай яндырай тотоналар.* С. Кулибай.— *Нихәл, Дәүли? Эш тибешме, шәбәйәһеңме?* Д. Юлтый.

**ТИБЕШЕҮ** *ҡ.* **1.** *урт. кар.* **тибеү** 1.

**2.** *диал. кар.* **тибеү** 1.

● *Тибешкәндә лә тиңең менән тибеш.* Әйтем.

**ТИБЕШКӘК** *с.* Тибә торған ғәҙәтле. *Тибешкәк ат.*

● *Тибешкәк тип бейәнән биҙмә.* Әйтем.

**ТИБЕШЛЕ** *с. кар.* **тибеш**[2]. *Тибешле ат.*

**ТИБЕШТЕРЕҮ** *ҡ. йөкм. кар.* **тибешеү.**

● *Яҡындағы тибештерә, алыҫтағы килештерә.* Әйтем.

**ТИБРӘЛЕҮ** *ҡ. диал.* Тирбәлеү.

**ТИБРӘНЕҮ** *ҡ. диал.* Тирбәлеү.

**ТИБРӘТЕҮ** *ҡ. диал.* Тирбәтеү.

♦ **Ҡәләм тибрәтеү** *кар.* **ҡәләм 1.**

**ТИБРӘҮ** *ҡ. диал.* Тирбәлеү.

**ТИБӘГӘН** *с. иҫк.* Тибә торған ғәҙәтле; тибешкәк. *Ҡабағандан ҡаптырма, тибәгәндән типтермә* (Теләмештән).

**ТИБӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Аяҡты тибеп-тибеп алған һымаҡ йөрөтөү. *Тибәләнеп атыу.*

**ТИБӘЛӘҮ** *ҡ. диал.* Типкеләү.

**ТИБӘН: тибән энә** *диал.* ҙур йыуан энә.

**ТИБӘРЕҮ** *ҡ. диал. кар.* **ҡағыу**[1]. *Ситкә тибәреү.*

**ТИГЕҘ** *с.* **1.** Өҫкө йөҙө шыма, яҫы, соҡор-саҡыры булмаған. *Тигеҙ ер. Тигеҙ иҙән. Тигеҙ юл.* ■ *Арҡа өҫкәйендә һигеҙ юл, һигеҙе лә тигеҙ юл* (Халыҡ йырынан).

**2.** Бөгөлдәре булмаған, тура, төҙ. *Тигеҙ һыҙыҡ. Тигеҙ сафҡа теҙелеү. Тигеҙ ситле япраҡ. // Тубәләрен [өйҙәрҙең] арыш һаламы менән тигеҙ .. итеп япҡандар.* Д. Юлтый.

**3.** Оҙонлоғо, бейеклеге бер тиң булған. *Остары тигеҙ. // Тигеҙ үҫеү.* ■ *Икебеҙ ҙә буйға бер тигеҙ.* С. Агиш. *[Ағастарҙың] осо тигеҙ итеп ҡырҡылған* (Әкиәттән).

**4.** Дәүмәлгә, ҙурлыҡҡа бер тиң булған. *Тигеҙ тауҙар. Тигеҙ тештәр.* ■ *Улар [өйҙәр] тигеҙ генә дүрткел-дүрткел булып бер тау башына менеп китә.* Һ. Дәүләтшина. *// [Сәғиҙә:] Мансур, хәрефтәреңде .. тигеҙерәк, матурыраҡ итеп яҙырға тырыш.* М. Тажи.

**5.** Иҫәп, үлсәм яғынан бер тиң булған. *Тигеҙ өлөш. Тигеҙ итеп бүлеү.* ■ *[Индрил:] Иптәштәр, һөт әҙ, тигеҙ булһын өсөн берәр ҡалаҡлап алайыҡ.* Д. Юлтый. *Бәхет һәр кемгә тигеҙ теймәгән.* З. Биишева.

**6.** Көсө, һәләте яғынан, дәрәжәһе менән бер тиң булған. *Тигеҙ байлыҡ. Тигеҙ көс.* ■ *Тауҙар тигеҙ булмаған кеүек, таланттар ҙа тигеҙ түгелдәр.* Н. Нәжми. / Хоҡуҡ йәһәтенән бер тиң булған. *Бер тигеҙ бай ярлы менән, юҡ уның артыҡлығы.* Ш. Бабич. *Уларҙың [йәштәрҙең] тигеҙ, татыу тороуына һоҡланып һөйләй-һөйләй ауыҙ һыуы ҡорой кешенең* (Әкиәттән).

**7.** Булыу кимәле, ғәмәлләшеү көсө бер булған. *Тигеҙ яҡтылыҡ. // Тигеҙ яңғырау.* ■ *Станок бер тигеҙ тауыш менән зырлап әйләнә.* Б. Бикбай. *Тыныс ҡына, тигеҙ генә яҡтыртҡан ай Ырғыҙ йылғаһының тулҡындарында өнһөҙ шаяра.* Һ. Дәүләтшина.

**8.** Бер ыңғайлы, бер яйлы. *Тигеҙ аҙым. Тигеҙ хәрәкәт. // Тигеҙ атлау. Йөрәк тигеҙ тибә.* ■ *Күмәк ат .. тигеҙ тартмай бит ул, ялҡауы ла, хәйләгә һалышҡаны ла була.* Б. Бикбай.

**ТИГЕҘЛЕК** *и.* **1.** Киң, тигеҙ ер өҫтө. *Муйыллының ике яғы — уйпат тигеҙлек.* Б. Бикбай.

**2.** Йәмғиәттәге урын һәм хоҡуҡ йәһәтенән булған тигеҙ хәл; тиңлек. *Тигеҙлек өсөн көрәшеү. Тигеҙлеккә өлгәшеү.*

**3.** *мат.* Ике тигеҙ өлөштән торған математик формула.

♦ **Тигеҙлек билдәһе** *мат.* математик тигеҙлекте белдергән билдә (=).

**ТИГЕҘЛӘГЕС**[1] *и.* Төҙөлөштә яҫылыҡтың горизонталлеген тикшерә торған ҡорал.

**ТИГЕҘЛӘГЕС**[2] *и.* Ниҙе лә булһа тигеҙләй торған машина.

**ТИГЕҘЛӘМӘ** *и.* Билдәһеҙ һанды эсенә алған тигеҙлек. *Квадрат тигеҙләмә. Тигеҙләмәне сығарыу.*

**ТИГЕҘЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. кар.* **тигеҙләү** 1, 2. *Тигеҙләнгән юл.*

**2.** Тигеҙгә әйләнеү; тигеҙ булыу. *Силәбене үтеүгә ер өҫтө тамам тигеҙләнде.* Р. Шәкүр.

**ТИГЕҘЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. кар.* **тигеҙләү** 1, 2. *Юлды тигеҙләтеү.*

**ТИГЕҘЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Ниҙеңдер өҫкө йөҙөн тигеҙ итеү. *Ерҙе тигеҙләү. Юлды тигеҙләү.* ■ *Өмөтбайҙың бисәһе иҙәндең соҡор-саҡырын әлдән-әле тигеҙләп һылап торғанға ул .. тип-тигеҙ булып ҡатып киткән.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Ос, башын, оҙонлоҡ, бейеклеген бер итеү; тиң итеү. *Бағана баштарын тигеҙләү. Тигеҙләп ҡырҡыу. Тигеҙләп теҙеү. Тигеҙләп ултыртыу.*

■ *[Ат:] Өс бөртөк ҡылымды тигеҙләп ҡарарһың да ҡайныһы ҡыҫҡа булһа, шуныһын дүңгәләкләп, эсенән һыҙғырырһың* (Әкиәттән).

**3.** Дәүмәл, ҙурлығын бер итеү, тиң итеү. *Байгужа Новиков ҡулынан икмәкте алып .. тигеҙләп ҡырҡа башланы.* Д. Юлтый.

**4.** Иҫәп, үлсәмен бер итеү; тиң итеү. *Тигеҙләп бүлеү. Тигеҙләп үлсәү. Тигеҙләп өләшеү.* ■ *[Тау батыр:] Бынау ерҙең тауы йыш булған, ә тегендә һирәк булған, шуларҙы тигеҙләп ултыртып йөрөйөм* (Әкиәттән).

**5.** Хәл, дәрәжә, хоҡуҡ йәһәтенән бер итеү. *[Динселәр:] Алла тигеҙләмәгәнде большевиктар тигеҙләйме һуң инде.* И. Насыри.

**ТИГЕҘЛӘҮЕС** *и.* Горизонталь тигеҙлекте билдәләү ҡоралы.

**ТИГЕҘЛӘШЕҮ** *к.* **1.** *урт. ҡар.* **тигеҙләү** 1, 2. *Юлды тигеҙләшеү.*

**2.** Үҙ-ара тигеҙ хәлгә килеү, тигеҙ булыу. *22 сентябрҙә көн менән төн тигеҙләшә.*

**ТИГЕҘҺЕҘ** *с.* Өҫкө йөҙө ҡытыршы, соҡор-саҡырлы. *Тигеҙһеҙ ер. Тигеҙһеҙ юл.* / Ҡыры, сите төҙ түгел, кәкерсәкле. *Өҫтәл сите тигеҙһеҙ.* // *Иҙәнде тигеҙһеҙ түшәү.*

**ТИГЕҘҺЕҘЛЕК** *и.* **1.** Тигеҙһеҙ урын. *Юлдың тигеҙһеҙлеге.*

**2.** Йәмғиәттәге урын һәм хоҡуҡ йәһәтенән булған тигеҙһеҙ хәл. *Синфи тигеҙһеҙлек. Социаль тигеҙһеҙлек. Экономик тигеҙһеҙлек.*

**3.** *мат.* Ике өлөштөң тигеҙ түгеллеген күрһәткән математик формула.

◆ **Тигеҙһеҙлек билдәһе** *мат.* алгебраик тигеҙһеҙлекте белдергән билдә $\rangle$, $\langle$.

**ТИГЕЛЬ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Төрлө материалды иретеү, ҡайнатыу йәки йылытыу өсөн утҡа бик сыҙамлы нәмәнән эшләнгән һауыт.

**2.** *типогр.* Буяулы хәрефкә ҡағыҙҙы баҫа торған ауыр тимер таҡта.

**ТИГЕН** *с.* **1.** Хаҡ түләнмәй буштан килгән. *Тиген әйбер.* ■ *Йортобоҙҙа тиген йәки аҙ баһалы деғет менән күп эшләмәк мәнег ҡылына.* «Батыршаның хаты».

**2.** *күсм.* Мәғәнәһеҙ, әһәмиәтһеҙ; буш. *[Нәсимә:] Кем икәнлектәрен әйтмәнеләр. Әммә ләкин телефон аша заказать итерлек булғас, тиген кешеләр түгелдер инде.* Н. Иҙелбай. *[Бабай:] Әйҙә, Нәғим улым. Тиген түгел был... Әҙәм заты дөм ҡараңғы төндә йырлап йөрөмәҫ.* Н. Мусин.

**3.** *күсм.* Зыян, зарар теймәгән; имен. *Һәр ваҡыт эҫе мейес алдында тороп эшләүгә өҫтәге кейемдең тиген ере ҡалмай.* Ж. Кейекбаев.

● **Икһәң иген, эсерһең тиген.** Мәҡәл.

**ТИГЕНГӘ** *р.* **1.** Хаҡһыҙ, бушлай. *[Арыҫлан:] Бөтөнләй буш бирергә әллә уны кәбеҫтә башы тип беләһеңме?.. Кәбеҫтәне лә тигенгә бирмәйҙәр.* С. Ҡудаш.

**2.** *күсм.* Сәбәп, мәғәнәһеҙгә, бушҡа, юҡҡа.— *Ай-һай, уландар, был һис тигенгә түгел. Тиҙерәк ҡайтып ҡалыуыбыҙ хәйерле.* Й. Солтанов. *Йәне барҙың, йүне бар, тип тигенгә әйтмәйҙәрҙер.* Я. Хамматов.

**ТИГӘЛБЫРҘЫ** *р. диал.* Юҡҡа, бушҡа. *Тигәлбырҙы ҡысҡырыу.*

**ТИҘ** *р.* **1.** Ашығыс рәүештә; етеҙ, йәһәт. *Тиҙ атлау. Тиҙ йөрөү. Тиҙ ҡуҙғалыу. Тиҙ-тиҙ эшләү. Тиҙ булыу. Эште тиҙ тотоу.* ■ *[Ирйегет:] Тиҙерәк, йәһәтерәк йөҙ, Бураншаl Күп ҡалманы йөҙөргә!* З. Биишева. *[Батша] тиҙ генә үҙенең сапҡындарын ебәрә* (Әкиәттән).

**2.** Ҡыҫҡа ваҡытта. *Тиҙ барып етеү. Тиҙ табып алыу.* ■ *Таңдар атһа ине тиҙерәк.* К. Кинйәбулатова. *Бөтә тиҙ донъя малы, мәңге тормай.* Ш. Бабич. **Тиҙ арала** (*йәки* **көндә**) ҡыҫҡа ваҡыт эсендә. **Тиҙ ҡулдан** ашығыс рәүештә, ҡабалан, йәһәт. *Тиҙ ҡулдан ғына эшләү.*

**ТИҘҘӘН** *р.* Тиҙ арала, тиҙ ваҡыт эсендә; оҙаҡламай.— *Көтһәң, көт әйҙә. Тиҙҙән килерҙәр инде улар.* С. Агиш. *Тиҙҙән Урман батырҙың иптәштәре әйләнеп ҡайтҡан* (Әкиәттән).

**ТИҘЕРЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **тиеү** 1. *Ҡулға төшкән Дутов ялсыларын эһ тиҙермәй эшен бөтөрөү.* Ш. Бабич.

**ТИҘЛЕК** *и.* **1.** Эш-хәрәкәттең ҡыҫҡа ваҡытта, ашығыс башҡарылышы. *Улар [эшселәр] тиҙлек менән һалдаттар араһында буталырға .. керешә.* Д. Юлтый.

**2.** Хәрәкәттең ваҡытҡа ҡарата булған нисбәте. *Икенсе космик тиҙлек.* ■ *Күктә киҫәк-киҫәк болоттар күҙ әйәрмәҫ тиҙлек менән ағыла.* Б. Хәсән.

**3.** Машинаның йөрөшөн ваҡытҡа ҡарата билдәләгән дәрәжә. *Беренсе тиҙлек. Тиҙлекте алмаштырыу. Тиҙлекте кәметеү.*

◆ **Йәшен тиҙлеге менән** бик тиҙ. *Хәбәр .. йәшен тиҙлеге менән бөтә ауылға таралды.* Һ. Дәүләтшина. **Тиҙлек коробкаһы** *ҡар.* **коробка.**

**ТИҘЛӘНЕШ** *и.* **1.** Ғәҙәттәгенән тиҙерәк, шәберәк булған эш-хәрәкәт. *Тиҙләнеш осоро.*

**2.** *физ.* Хәрәкәт тиҙлегенең ваҡыт берәмегендә үҙгәреү дәүмәле. *Ирекле ҡолауҙың тиҙләнеше. Нөктәнең үҙәккә ынтылыу тиҙләнеше.*

**ТИҘЛӘНЕШЛЕ** *с.* **1.** Ғәҙәттәгенән тиҙерәк, шәберәк булған эш-хәрәкәткә ҡоролған. *Хәҙер иһә тиҙләнешле заманыбыҙ яңы быуат ҡапҡаларын ҡаға.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 9 июль.

**2.** Ғәҙәттәгенән ҡыҫҡараҡ срок эсендә башҡарыла торған. *Инглиз теленең тиҙләнешле курсын үтеү.*

**ТИҘЛӘТЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **тиҙләтеү.** *Тиҙләтелгән метод.*

**ТИҘЛӘТЕҮ** *к.* **1.** Ашығыс, етеҙ итеү. *Аҙымды тиҙләтеү.* ■ *Ул [карт] ынтылып-ынтылып атын ҡыуа, йөрөшөн тиҙләтергә тырыша.* Д. Юлтый.

**2.** Эш, хәрәкәттең ваҡыт араһын ҡыҫҡартыу; ашыҡтырыу. *Эште тиҙләтеү.* ■ *Ул [ҡатын] һуҙ-маҙар тейеүҙән ҡурҡып, ашып тиҙләтергә керешә.* Б. Бикбай. *Бөгөн бюрократизм — беҙҙең төп бурысты хәл итеү — илебеҙҙең социаль-экономик үҫешен тиҙләтеү һәм ошоноң менән бәйле хужалыҡ итеү механизмын тамырынан үҙгәртеп ҡороу юлында етди кәртә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.

**ТИҘЛӘҮ** *к.* Тиҙ эш итеү, тиҙ булыу. *[Зөһрә:] Кисә ун дүрт большевикты атҡандар, тигән хәбәрҙе ишеттек. Ашарға бирмәйҙәр, тиҙләүегеҙҙе көтәбеҙ.* А. Таһиров. *Яҙа [бала] .. ҡулдарына әйәрмәй күҙ, кәләм орсоҡтай уйнай, ул, нык баҫып, яһаһам тиҙ, еңеү тиҙләр тип уйлай.* Б. Бикбай.

**ТИҘ-ТИЛӘ** *р. диал.* Тиҙ генә, йәһәт кенә. *Ҡайта алмам бик тиҙ-тилә.* Й. Солтанов.

**ТИҘӘК** *и.* **1.** Мал-тыуар, ҡош-ҡорттоң оло ярауынан йыйылған сүп. *Тауыҡ тиҙәге. Һыйыр тиҙәге.* ■ *Ҡайҙа барма — бысраҡ. Уҙған йылғы тиреҫ тә, быйылғы тиҙәк тә түгелмәгән.* И. Ғиззәтуллин. / Мал-тыуар һәм ҡош-ҡорттоң ятып кипкән оло ярау сүбе. *Тиҙәк йыйыу.* ■ *Гөлйөҙөмдөң быҫҡып ятҡан ҡыр тиҙәгенә өрә-өрә биттәре ҡып-ҡыҙыл булған.* Һ. Дәүләтшина. / *кит.* Оло ярау менән бүленгән сүп.

**2.** Малдың оло ярау сүбенән баҫып, кирбесләп һуҡҡан яғыулыҡ. *Тиҙәк көлө. Тиҙәк яғыу.* ■ *Ҡатын-ҡыҙ балаҡтарын төрөп, таҡталарын яңы сығып килгән үлән өҫтөнә .. һалып, тиҙәк һуғырға кереште.* С. Агиш.

♦ **Тиҙәк тибеү** *кар.* **тибеү**.

**ТИҘӘКЛӘҮ** *к.* **1.** Тиҙәк менән бысратыу. *Һыйыр ятҡан урынын тиҙәкләп бөткән.*

**2.** Тиҙәк менән ашлау. *Һөргән булһаң шул ерҙе, һөргән һайын таш сыға, гүмер буйы тиҙәкләйһең, ә ағара башҡынаң.* С. Кулибай.

**ТИҘӘМӘН** *р. диал.* Ашығыс, йәһәт.

**ТИЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **тиеү** 1.

**ТИЕРЛЕК** *р.* Тулы күләм, дәүмәлгә, сифат, рәүешкә яҡын булғанды белдерә. *Һәр кеше тиерлек. Көн һайын тиерлек. Эш юк тиерлек.*

**ТИЕҮ** *к.* **1.** Һүҙ менән уй,фекер белдереү; әйтеү. *«Һине лә үҙем менән алып китәм, һылыуым»,— тине Аҙнагол.* З. Биишева. *«Ниңә ҡайттың, балам?» — тиһә әсәй, «Һағындырҙы һине»,— тиермен.* Ғ. Амантай. / Әкиәт, хәбәр һөйләгәндә шаһитһыҙлыҡ, тасуирлыҡ мәғәнәһе бирә. *Амазонка буйы матур, тиҙәр, иң матур ер, тиҙәр, донъяла.* М. Хәй. *Борон-борон заманда ҡара урман эсендә бабай менән әбей йәшәгән, ти* (Әкиәттән).

**2.** Уй, фараз итеү, уйлау. *Беҙ тигәнсә булды донъя, беҙҙә ялҡын, беҙҙә ут.* Б. Ишемғол. / Ҡарар итеү, ҡарарға килеү; ниәтләү. *Ысынлап тороп квартира эҙләргә тинек тә, ҡала урамы буйлап .. киттек.* С. Агиш.

**3. тигән** Атама һуңынан килеп, «исемле», «шулай атала торған» мәғәнәһен белдерә. *Ҡарамалы тигән ауыл. Таҙғара тигән ҡош.* ■ *Беҙ Проскуров тигән ҙур станцияла ҡалырға булдыҡ.* Д. Юлтый. / Әйтелгән һүҙ, фекер һуңынан килеп, уның бөткәнен белдерә. *Сәгиҙә .. «ярар, шулай тип әйтермен» тигән мәғәнәлә баш ҡаҡты.* М. Тажи.

**4. тигәндә** Дауам иткән ваҡыт араһын белдерә. *Бишенсе көн тигәндә бер түшәрлек түҙ һыҙырып, баҙға түшәнек.* С. Кулибай. / Бер эш-хәл башҡарылған ғына мәлдә икенсе бер эш-хәл булғанын билдәләй. *Инде юлға сығабыҙ тигәндә, ямғыр коя башланы.*

**5. тигәндә** Күләмде белдергән һүҙҙәр менән килеп, мәғәнә тулылығын сикләүҙе белдерә. *Күп тигәндә. Кәм тигәндә. Әҙ тигәндә. Юҡ тигәндә.* ■ *Район эшсәндәре .. быйыл дәүләткә кәм тигәндә йөҙ илле мең тонна иген һатырға булды.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 2 октябрь.

**6. тигәндә** Ҡылыҡ,тәбиғәттең йүнәлешен белдерә. *Ата ялҡау, тел тигәндә ҡылды ла телеп һалыр, эш тигәндә, таш йоҡандай, бөтөнләй өнһөҙ ҡалыр.* А. Игебаев.

**7. тигәндәй** Мәҡәлдәрҙе, тотороҡло һүҙ бәйләнештәрен, уй,фекерҙе һөйләм эсенә алыу өсөн ҡулланыла. *[Миңлебай:] «Күп йәшәгән ни белә, күпте күргән шул белә» тигәндәй, һин үҙең бер нәмә лә белмәйһең дә баһа.* Т. Йәнәби. *Зыя «шаяртма» әле тигәндәй, иренен турһайтты.* М. Тажи.

**8. тигәндәй** Тулы күләм, дәүмәлгә, сифат, рәүешкә яҡын булғанды белдерә. *Йоҡоһоҙ тигәндәй төн уҙғарыу. Күрше тигәндәй йәшәү. Талап тигәндәй алыу.*

**9. тип** Тултырыусы һөйләмде баш һөйләмгә бәйләү өсөн ҡулланыла. *Осһоҙ хаҡҡа сиртмәм микән, тип, ул [Миңьян] шул малдарҙы аулап йөрөнө.* Ғ. Сәләм.

**ТИЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **тиеү** 1. *Көн матур, бер аҙ яр ситенә сығып йөрөйөк, тиештек.* Т. Йәнәби.

**ТИЖАРӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Сауҙа.— *Сыртланов ағайҙың сауҙа һәм тижарәт эштәрендәге маһирлығы арҡаһында, .. Башторг хәҙер өс магазин тота.* С. Агиш.

**ТИК** [1] *кире терк.* Ҡаршы ҡуйылған һүҙ йәки һөйләмде теркәй. *Ул [Сәгиҙә] ауыр яҙмышы хаҡында Гөлнурға ла яҙҙы, тик унан яуап булманы.* М. Тажи. *Кеше бик борон-борондан алға ынтылған һаман, тик алғы көндәрҙе ул саҡ томалап торған заман.* Р. Ниғмәти.

**ТИК** [2] *киҫ.* Үҙенән һуң килгән һүҙҙе айырып сикләү өсөн ҡулланыла. *Мин .. ҡаланың матурлығы тик ҙур таш биналар, магазин тәҙрәләрендәге биҙәктәр менән генәлер тип уйлай инем.* С. Агиш. *Ә мин һандуғасты түгел, тик һине көтәм.* К. Кинйәбулатова.

**ТИК** [3] *р.* **1.** Бер ни эшләмәй, эш, хәрәкәтһеҙ. *Зөләйхә башын эйгән бер ни өндәшмәй, тик ултыра.* Т. Йәнәби. *Уларға [һалдаттарға] тик кенә тороп үлем көтөү ҡыйын ине.* И. Насыри.

**2.** Бер рәүешсә, бер ҡиәфәтсә, бер ыңғайға. *Ҡарап тик тороу. Һөйләнеп тик ултырыу. Эшләп тик йөрөү.* ■ *Беҙ шул эҙҙән тик барырбыҙ, таймабыҙ бармаҡ кәҙәр.* Ғ. Ғүмәр.

♦ **Тик торғанда** ерле юҡтан, сәбәпһеҙ-ниһеҙ, уйламағанда.

**ТИК** [4] [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Һиндостанда, Индонезияла үҫкән эре аҡ сәскәле тығыҙ, ҡаты ағас (карап, порт һ. б. төҙөүҙә ҡулланыла). *Томбойоҡтар япрайып, тик ағастай сәскә атҡан.* «Урал батыр».

**ТИК** [5] [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Буйлы итеп һуғылған беше етен йәки мамыҡ туҡыма (түшәк, ҡаралды тышлығы өсөн). // *Тик тышлыҡ.*

**ТИК** [6] *с. кар.* **тиген.**

**ТИК** [7] *и. иҫк.* Нәҫел, нәсәп төбө; сығыш. *Үҙ тигеңде белеү.*

**ТИКЕС** *и. диал.* Бәкәл.

**ТИККӘ** *р.* Ерле юҡҡа; бушҡа. *Тиккә йөрөү.* ■ *Ҡыш бабайҙы тиккә генә «һыуыҡ бабай» тимәйҙәр.* С. Әлибаев.

**ТИКЛЕМ** *бәйл.* **1.** Төбәү килештәге һүҙҙәр менән килеп, ара, ваҡыт сиген белдерә; ҡәҙәр, саҡлы. *Ауылға тиклем. Быға тиклем. Йәйгә тиклем.* ■ *Хәйҙәр Сәгиҙәне ҡыҙҙар ятағына тик-*

*лем оҙата килде.* М. Тажи. *Ырымбурҙа майҙың 15-енә тиклем .. беҙгә һалдат уйыны өйрәттеләр.* Т. Йәнәби.

**2.** Төп килештәге һүҙҙәр менән килеп, сағыштырма күләм, дәрәжәне белдерә; ҡәҙәр, саҡлы. *Йоҙроҡ тиклем һуған. Башмаҡ тиклем бүре.* ■ *Һуғышта һалдат үлеме туғайҙа сабылған бесән бөртөктәре тиклем дә тәьҫир бирмәй.* Д. Юлтый. / Кемде йәки ниҙелер үҙ-үҙенә сағыштырыу рәүешендә дәрәжәһен күтәреү өсөн ҡулланыла. *[Ҡарт:] Өфө тиклем Өфөгә барыла бит, ҡарсыҡ. Әллә ниндәй түрәләр менән күрешеүең ихтимал.* Р. Низамов.

◆ **Бер ни тиклем** күпмелер, бер аҙ. *Бер ни тиклем ваҡыттан һуң.* **Был (йәки шул) тиклем** бик ныҡ, бик, үтә. *Һөнәрсе өйрәнсектең был тиклем изгелеклегенә хайран ҡал[ған].* З. Биишева. **Әллә ни тиклем** күп, бик күп. *Ҡапҡа төбөнә әллә ни тиклем халыҡ йыйылған ине.* Д. Юлтый.

**ТИКМӘГӘ** *р.* Ерле юҡҡа, бушҡа; тиккә. *Ауылға стражник килһә инде, ул тикмәгә булмай: йә страховка йыйыуы түләмәгән өсөн, йә мәгәзәйгә арыш һалмаған өсөн халыҡтың малын яҙып китә.* А. Карнай. *Эйе, картым йорттар һалышҡан, тәҙрә ҡуйған, ҡыйыҡ ябышҡан, оҫта тимәйҙәр бит тикмәгә, ҡул көстәре әрәм китмәгән.* С. Кулибай.

**ТИКМӘС** *с. диал.* Тиген.

**ТИКМӘСКӘ** *р. диал.* Тиккә.

**ТИКСЕ[М]** *бәйл. диал.* Тиклем.

**ТИКТОМАЛҒА** *р.* Һис бер сәбәпһеҙ, нигеҙһеҙ; буштан-бушҡа. *[Сәйфетдин:] Әллә һин байҙар тиктомалга ҡурҡа тиһеңме?* Я. Хамматов. *Ҡотлойәркәев ҡыҙыу эш ваҡытында идарага тиктомалга ғына килмәгәйне. Әйүпов уны һиҙеп торһа ла, әле генә тыңлап торорга теләмәгәнлеген күрһәтеп, ауыҙ ҙа асырманы.* Ғ. Ибраһимов.

**ТИКТОМАЛДАН** *р. кар.* **тиктомалға.** *Үҙе [Вәсилә] был көндәрҙә һис кенә лә һүҙ күтәрмәй башланы. Юҡ ҡына һүҙгә лә хәтере кала, тиктомалдан асыуланып, үпкәләп бара.* Ф. Әсәнов.

**ТИКТОРМАҪ** *ҫ.* Тик тороп сыҙамаған. *Тиктормаҫ Исмәгил был юлы ла ҡыҫылмай калманы.* Я. Вәлиев.

**ТИКТӘН** *р. кар.* **тиккә.**

**ТИКТӘН-ТИК** *р.* Буштан-бушҡа, тиккә. *Тиктән-тик йөрөү.*

**ТИКТӘҪ** *с.* Әһәмиәтһеҙ, буш; тиген. *Ул тауыштар тиктәҫ тауыш түгел, унда ни булһа ла бер эш бар.* Д. Юлтый.

**ТИКТӘҪКӘ** *р.* Тиккә, бушҡа. *Урал мәғдән, бәхет төйәге, тип әйтмәйҙәр бит бер ҙә тиктәҫкә.* А. Игебаев.

**ТИКҺЕҘ** *с. иҫк.* Нәҫел-нәсәбе күренекһеҙ; ырыуһыҙ, затһыҙ. *Ете атаһын һорамай, тикһеҙҙең ҡыҙын алмағыҙ* (Ҡобайырҙан).

**ТИКШЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **тикшереү** [1]. *Тикшерелгән мәсьәлә. Ентеклэп тикшерелеү.*

**ТИКШЕРЕНЕҮ** [1] *к.* Төпсөп тикшереү; белергә, асыҡларға тырышыу. *Хоббониса абыстай .. үҙ тормошондағы булып килгән һәр бер һикәлтәләренә тиклем тикшеренде, тормоштоң йәлы-йәйһыҙ яҡтарын берәм-берәм башынан үҙғарҙы.* Т. Хәйбуллин.

**ТИКШЕРЕНЕҮ** [2] *и.* Берәй мәсьәләне хәл итеүгә ҡоролған эҙләнеү эше. *Ғилми тикшеренеү алып барыу.*

**ТИКШЕРЕНЕҮСЕ** *и.* Тикшеренеү [2] үткәреүсе; ғалим.

**ТИКШЕРЕҮ** [1] *к.* **1.** Берәмекләп, ентекләп, төпсөп, күҙҙән үткәреү. *Нәмәләребеҙҙе ҡарай, тикшерә башланыҡ. Бөтәһе лә теүәл.* Д. Юлтый. / Яраҡлы-яраҡһыҙлығын билдәләү өсөн күҙҙән үткәреү. *Билетты тикшереү. Документты тикшереү.*

**2.** Белергә тырышып төпсөү. *Кем белә, бәлки, ысындан да ауырыу булғандыр.. Тикшерһендәр.* Б. Бикбай. *[Мулла] баҙарҙа эсеп йөрөгәнен онотҡан, кеше тикшерә.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Өйрәнеү, асыҡлау өсөн төпсөп, анализ яһау. *Орлоктоң сығышын тикшереү.* ■ — *Өс йыл буйы шуларҙың [йәнлектәрҙең] ҡанын тикшерҙем. Теш алмаштырған осорҙа уларҙың ҡанында ла шул матдә булғанын белдем.* Д. Бураҡаев.

**4.** Ниҙеңдер хәлен, булмышын асыҡлау өсөн төпсөү. *Сәсеүгә әҙерлекте тикшереү. Эште тикшереү.* ■ *[Солтанов:] Ни бөтмәгән ревизия ул? Күптән түгел генә тикшерҙек бит.* Б. Бикбай. / Кемдең йәки ниҙеңдер бер төрлө сифат кимәлен асыҡлау өсөн төпсөү. *Белемде тикшереү. Диктантты тикшереү.* ■ *[Имай:] Яҡшы тырыштырығыҙ. Бигерәк тә руссаларын ныҡ тикшерергә кәрәк.* Һ. Дәүләтшина.

**5.** Ултырышҡа, йыйылышҡа ҡуйып, фекер алышыу. *Ғаризаны тикшереү. Эштең ҡуйылышын тикшереү.* ■ *Был шау-шыуҙа йыйылған халыҡ .. шунда уҡ сход йыйып, мәсьәләне тикшерергә уйланы.* Т. Йәнәби. *Хеҙмәт коллективтары дәүләт һәм йәмәғәт эштәрен тикшереүҙә һәм хәл итеүҙә .. ҡатнаша.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы. 1984.

**ТИКШЕРЕҮ** [2] *и.* **1.** Ултырышҡа, йыйылышҡа ҡуйып, фекер алышыу эше. *Дәүләт тормошоноң айырыуса мөһим мәсьәләләре бөтә халыҡ тикшереүенә сығарыла.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**2.** Енәйәткә бәйле хәл, ваҡиғаны тейешле органдар тарафынан асыҡлау эше. *Енәйәт буйынса тикшереү алып барыу.*

**ТИКШЕРЕҮСЕ** *и.* **1.** Тикшереү [1] эше менән булыусы.

**2.** Судҡа тиклем эште тикшереп, асыҡлау менән шөғөлләнеүсе.

**ТИКШЕРЕШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **тикшереү** [1]. *Эште тикшерешеү.*

**ТИКШЕРТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **тикшереү** [1]. *Эште тикшертеү.*

**ТИКӘ** *р. иҫк.* Бер аҙ, аҙ генә. *Абыз сәләмен алды, тине,.. «Алыҫтан килгән былар бисара икән, ултырың»,— тип, тикә емет һалды, тине.* «Буҙйегет».

**ТИКӘЙ** *с. диал.* **1.** *кар.* **буш** [1] 4, 5. *Тикәй саҡта.*

**2.** Ябай, ғәҙәттәге. *Тикәй еп. Тикәй көн. Тикәй оҫта.*

● *Тикәйҙең инәһе үлгән.* Мәҡәл.

**ТИКӘЙГӘ** *р. диал.* Бушҡа. *Тикәйгә йөрөү.*

**ТИКӘН** *и.* Үҫемлектәге энә; сәнскәк.

● *Гөл тикәнһеҙ булмай.* Мәҡәл.

**ТИЛ** *с.* **1.** Ҡушарлы, ҡуш. *Тил ағас. Тил ҡул.*

**2.** Бүтән инәне имгән (мал балаһына ҡарата). *Тил бәрәс. Тил колон.* **Тил быҙау** 1) бүтән инәгә ҡушылған быҙау; 2) быҙауы үлгән һыйырҙы алдап эйҙереү өсөн шул быҙау тиреһенә һалам тултырып яһаған ялған быҙау; толоп.

**ТИЛБЕ** *и. диал.* Тилебәрән.

**ТИЛБЕР** *с.* Эш-хәрәкәттә етеҙ. *Тилбер булыу. // Тилбер тотоноу. Тилбер эшләү.* ■ *[Иҙел:] Ҡымыҙға тилбер кеше кәрәк. Ҡымыҙ уйнаҡлап торған кешене ярата, үҙе лә уйнаҡлата.* Ш. Насыров. *Бәләкәйҙән эшкә тилбер булды Кәримә. Баҫыуҙа ла өлкәндәрҙән ҡалышмай эшләне.* Н. Мусин.

**ТИЛБЕРЛЕК** *и.* Эш-хәрәкәттә етеҙлек, йылдамлыҡ. *Ҡайһы мәлдә һуғышта йылы аш ашатыу мөмкинлеге булмай. Поварҙың тилберлеге етмәгән саҡ та булғылай.* С. Әлибаев.

**ТИЛБЕРЛӘНЕҮ** *ҡ.* Тилбергә әйләнеү, тилбер булыу. *Эшкә килеп тотоноу менән Мансурҙың ҡулдары тағы ла тилберләнеп китте.* Ғ. Вәлиев.

**ТИЛБӘ** *и.* Йылҡы малын тартыштырып, әйләнсек яһай торған яман ауырыу. *[Фәхри] көнө буйы, тилбә булған ат кеүек, ҡайҙа барып һуғылғанын белмәй йөрөнө.* Б. Бикбай.

**ТИЛЕ** *с.* **1.** Аҡылға еңел; алйот, иҫәр. *Тиле кеше.* ■ *[Барсынһылыу:] Алтан да Алтан тигәнегеҙ Әйләр хандың улы икән. Алтан да Алтан тигәнегеҙ аҡылы ла юҡ тиле икән.* «Алпамыша». /Әрләгәндә әйтелә. *Һеҙгә һөйләгән мин тиле.* С. Агиш.

**2.** Шаян, дыуамал. *Тиле бала. Тиле йәшлек.*

**ТИЛЕБӘРӘН** *и.* Күкшел һарғылт сәскәле, ваҡ ҡына орлоҡло, тилертә торған еҫле үлән. *Билдәле булыуынса, күп төрлө ҡыр үҫемлеге, емеш-еләк, ҡайһы бер бәшмәктәр нык ағыулы, мәҫәлән, тилебәрән орлоғо, бүре еләге һ. б.* В. Ғүмәров. *Әтәс менән тауыҡ төйләгәнде тилебәрән орлоғо менән һыйланы, ти. Шунан төйләгән иҫереп йығылды, ти* (Әкиәттән).

**ТИЛЕЛЕК** *и.* **1.** Аҡылға еңеллек; алйотлоҡ, иҫәрлек.

**2.** Шаян, дыуамал ҡылыҡ; дыуамаллыҡ. *Йәшлектә күп, дуҫтар, тилелек. Гармун өсөн беҙ ҙә тилерҙек.* Ғ. Хәйри.

● *Иплегә иple тиһәң, иплелеген арттырыр, тилегә тиле тиһәң, тилелеген арттырыр.* Әйтем.

**ТИЛЕЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Тилегә әйләнеү, тиле булыу; тилереү.

**2.** Еңел аҡыл менән, дыуамаллыҡ менән эш итеү.

**ТИЛЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Тилегә әйләнеү, тиле булыу; алйотланыу. *Тилереп ауырыу.*

**2.** Тәртип самаһынан сығыу; шашыу, ҡотороу. *Бәхетең үҫеп, бай булһаң, мин баймын, тип тилермә.* Ш. Бабич. *Мөхәббәттән тилерһәк тә имдәр табылыр әле.* М. Кәрим.

● *Тиле тилергәндә, аҡыллы аҡыл һатҡан.* Мәҡәл.

**ТИЛЕРЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **тилереү.** *Тилерешеп йөрөү.*

**ТИЛЕРТЕҮ** *ҡ.* **1.** Тилегә әйләндереү, тиле итеү. *Тилебәрән орлоғо кешене тилертә.*

**2.** Тәртип самаһынан сығарыу; шаштырыу, ҡотортоу. *Байлыҡ кешене тилертә.*

● *Ҡымыҙ эсһәң — тилертә, һаумал эсһәң — һимертә.* Әйтем.

**ТИЛЕТЕҮ** *ҡ.* **1.** Икеһен бергә ҡушыу, ҡуш итеү. *[Халыҡ — Һәүбәнгә:] Ай илдең арыҫланы, нисәмә йыл ҡол иткән, үҙенә көсләп тилеткән яуыз хандың ҡулынан илде азат иттең һин.* «Аҡбуҙат».

**2.** Бер-береһенә сит булған мал инәһе менән балаһын ҡушып эйәләштереү. *Ҡолондо тилетеү. Тилетеп һауыу.*

**ТИЛЕҮ** *ҡ.* **1.** Бергә ҡушылыу, ҡуш булыу; ҡауышыу. *Айырылышҡас, ҡабат тиле.*

**2.** Ҡушылып, эйәләшеү (бер-береһенә сит булған мал инәһе менән балаһына ҡарата). *Ят бейәгә тилегән колон. Тил быҙауға тилгән һыйыр.*

**3.** *ҡар.* **тилетеү** 2. *Баҡырма ла һыйырым эй, баҡырма, тил быҙауҡайыңа тилермен* (Халыҡ йырынан).

**ТИЛЛӘҮ** *ҡ. ҡар.* **тилетеү.**

**ТИЛМЕРЕҮ** *ҡ.* Ниндәйҙер мәхрүмлектә зар булыу; зарығыу. *Аҫҡа тилмереү. Икмәккә тилмереү. Көтөп тилмереү. Тилмереп көтөү. Тилмереп ҡарау.* ■ *Ата-әсә фронттарға китте, ә балалар ҡалды тилмереп.* Р. Ниғмәти. *[Тимеркәй:] Мин тормошта үҙ алдымараҡ йәшәргә яратам шул. Тилмереп, кеше ҡулына ҡарап тороуҙы йәнем һөймәй.* М. Хәйҙәров. *Ат яҡшыҡайҙары ай юрта ла тилмерепкәй тора кәртәлә* (Халыҡ йырынан).

**ТИЛМЕРЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **тилмереү.** *Их, ҡалды шул беҙгә тилмерешеп, Саҡ менән Суҡ кеүек йәшәргә.* А. Игебаев.

**ТИЛМЕРТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **тилмереү.** *[Әсмә] үҙе ас булһа ла балаларын икмәккә тилмертмәне.* Х. Мохтар.

**ТИЛСӘ** *и.* **1.** Йылҡының ауыҙ эсенә сыҡҡан шешек. *Тилсә тамырын ҡырҡыу.*

**2.** *диал. ҡар.* **силсә** 1.

◆ **Теленә** (*йәки* **телеңә**) **тилсә сыҡҡыры** теле яман кешене ҡарғап әйтелә.

**ТИЛҪӘ** *и. диал.* Кештәк.

**ТИЛӘКҺЕҮ** *ҡ. диал.* Йөрәкһеү.

**ТИЛӘР** *с. диал.* Тиле.

**ТИЛӘҪКӘҮ** *с.* Теләһә ҡалай күп йөрөүсән; йөрөмтәл. *Тиләҫкәү кеше. Тиләҫкәү мал.*

**ТИЛӘҪПЕ** *и. диал.* Ҡыҙылса.

**ТИМ** [1] *и.* Билдәле бер ваҡыт; мәл. *[Салиха:] Сығып китте лә батты. Ҡайҙа йөрөй икән инде ошо тимгә тикле.* Ж. Кейекбаев.

**ТИМ** [2] *и. иҫк.* Мәйетте зыяратҡа алып бара торған тирәсле носилка.

**ТИМГЕЛ** *и.* Бер төҫтәге нәмәгә төшкән икенсе төҫтәге тап. *Ҡыҙамыҡтың тимгелдәре. Тынысһыҙланыуҙан йөҙгә тимгелдәр бәреп сығыу.* ■ *Ағас, үлән япраҡтарына алтын тимгел һирпеп, сентябрь килде.* Ә. Ихсан. *Байрамбикә тимгел япраҡлы ағасты ҡосаҡлап, үкһеп-үкһеп иларға тотонды.* Ш. Шәһәр.

**ТИМГЕЛЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Тимгел менән ҡапланыу, тимгелле булыу. *Яландағы епшегән ҡар тимгелләнеп уйыла.* Н. Иҙелбай.

**2.** Тимгел рәүешендә булыу. *Тимгелләнеп күренеү.* ■ *Ауылға ҡайһы яҡтан ғына күҙ һалһаң да офоҡ ситендә иң элек ошо ҡайынлыҡ тимгелләнә.* В. Нафиҡов.

**ТИМГЕТЕҮ** *к. диал.* Теркәү [1], ҡушыу. *Фактты тимгетеп ҡуйыу.*

**ТИМЕР** *и.* **1.** Химик элемент, углерод менән ҡушылғанда ҡорос һәм суйын бирә торған аҡ төҫтәге сүкелеүсән ауыр металл. *Тимер иретмәһе. Тимер рудаһы.*

**2.** Шул металдан булған нәмә. *Табаҡлы тимер. //Тимер бағана. Тимер көрәк. Тимер ҡапҡа. Тимер мейес. Тимер таяҡ. Тимер һәнәк.*

**3.** *с. мәг. күсм.* Ҡаты, ныҡ, көслө. *Бына бында тимер ҡуллы халыҡ ҡоя илдең ҡорос үҙәген.* М. Кәрим.

**4.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

♦ **Тимер үк** *кар.* **күк** [1] 5. **Тимер ҡаҙыҡ** *кар.* **тимерҡаҙыҡ. Тимер юл** *кар.* **юл. Типһә тимер өҙөрлөк** физик яҡтан ныҡ, таҙа кешегә ҡарата әйтелә.

**ТИМЕР-БЕТОН** *и.* Бетондың ҡорос арматура менән монолит берләшмәһенән ғибәрәт махсус ныҡлыҡтағы төҙөлөш материалы. *Тимер-бетон заводы. // Тимер-бетон күпер. Тимер-бетон конструкция.*

**ТИМЕРҒАҘЫҠ** (*баш хәреф менән*) *и.* Бәләкәй етегән йондоҙлоғона ингән, төньяҡ полюсҡа яҡын торған яҡты йондоҙ.

**ТИМЕРЕКЛӘНЕҮ** *к.* Ҡатҡыл, тығыҙға әйләнеү, ҡатҡыл булыу (тән, тороҡ ағзаһына ҡарата). *Һыйырҙың елене тимерекләнеп киткән.* М. Ҡулаев.

**ТИМЕРЛЕ** *с.* Тимер менән тоташтырыулы, тимер менән нығытыулы. *Тимерле арба.*

**ТИМЕРЛЕК** *и.* Тимерҙән сүкеп төрлө нәмә эшләй торған урын. *Ул [Тимергәле] сүкеш менән ҡып-ҡыҙыл тимергә ҡоласлап килтереп һуға, ут осҡоно тимерлеккә һибелә.* Ә. Зәйнуллин. *Бәләкәй генә тимерлектә ҡарт күректең һыҙғырып сыҡҡан тауышы, уның гөрөлдәүе, аллы-артлы тимер бүкән өҫтөнә төшкән сүкеш тауыштары менән беҙ ауылды йәнләндерҙек.* Б. Ишемғол.

**ТИМЕРЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **тимерләү.** *Тимерләнгән арба.*

**ТИМЕРЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **тимерләү.** *Арбаның тәгәрмәсен тимерләтеү.*

**ТИМЕРЛӘҮ** *к.* Тимерле итеү. *Сананы тимерләү. Тимерләп эшләгән һандыҡ.*

**ТИМЕРСЕ** *и.* Тимерҙән сүкеп төрлө нәмә эшләү оҫтаһы. *Ут эсендә янып, ҡыҙарып бөткән ҙур йөҙлө ҡарт тимерсе Рәфиҡ ағай үҙенең сүкешсеһенә команда бирә.* Ш. Шәһәр.

**ТИМЕРСЕЛЕК** *и.* Тимерҙән сүкеп төрлө нәмә яһау эше. *Тимерселеккә өйрәнеү.*

**ТИМЕРСЫБЫҠ** *и.* Тимерҙән нәҙек оҙон еп рәүешле итеп һуҙған нәмә. *Йыуан тимерсыбыҡ. Оҙон тимерсыбыҡ. Ҡорос тимерсыбыҡ. Сәнскеле тимерсыбыҡ.*

**ТИМЕР-ТОМОР** *и. йыйн.* Һәр төрлө тимер. *Тимер-томор йыйыу.* ■ *Ғариф ағайҙың тимер-томор тултырған йәшниге бар.. Кәрәк сағында шунан күп нәмә табып ала.* Б. Бикбай.

**ТИМЕРТЫРНАҠ** *и. диал.* Ҡәлмәргән.

**ТИМОФЕЕВКА** [*рус.*] *и.* Сәсеп үҫтерелә торған һепертке башлы, башаҡлы аҙыҡ үләне.

**ТИМРӘҮ** *и.* Тош-тош ерҙән ҡыҙарып, ҡубырсып йәки сейләнеп торған тире сире. *Ҡоро тимрәү. Һыулы тимрәү.*

**ТИМТЕРӘҮ** *к. диал.* Тилмереү.

**ТИМ-ТИМ** *р. диал.* Ваҡыт-ваҡыт. *Тим-тим ел иҫеп ҡуя.*

**ТИМТЫҘЫҠЛАУ** *к. диал.* Маҙаһыҙлау.

**ТИМТӘЛЕҮ** *к. диал.* Ниәтләү. *[Әбей:] Артыҡ һый-хөрмәт булмаһа ла, бер тимтәлгәс, саҡырайым, тинем.* Ж. Кейекбаев.

**ТИМЬЯН** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ирен сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған эфир майы булған ваҡ ҡына хуш еҫле сәскәле үҫемлек.

**ТИМӘК** *инш.* Әйтелгән һүҙгә, фекергә йомғаҡ, һығымта яһағанда ҡулланыла. *Ишек алдында бер ҡыҙ ҙа күренмәй. Тимәк, улар дәресҡә ингән.* Д. Юлтый. *Аня йылмайып, биш бармағын күрһәтте. Тимәк, уға биш йәш.* С. Кулибай.

**ТИМӘҮЛЕ** *с. диал.* Ыҡсым.

**ТИН** *и.* **1.** Бер һумдың йөҙҙән бер өлөшөнә торошло аҡса берәмеге. *Аҡтүбәгә еткәндә, минең кеҫәмдә егерме тин аҡса ҡалған ине.* Т. Йәнәби.

**2.** Бәләкәй, әҙ аҡса. *Һуңғы тиндәрҙе тотоп, киноһына ла барҙыҡ.* С. Агиш. **Һуҡыр [бер] тин** 1) бик әҙ генә аҡса. *Минең кеҫәмдә һуҡыр бер тин дә юҡ.* Ғ. Ғүмәр; 2) бик әҙ генә баһа. *Һуҡыр бер тин тормай.* ■ *[Ҡарт:] Ҡулығыҙҙан һуҡыр бер тинлек эш килмәй* (Әкиәттән).

♦ **Бер тингә лә** бер нәмәгә лә, һис тә. *Бер тингә лә кәрәге юҡ.* **Бер тин** дә бер нәмә лә, әҙ генә лә. *Ишектән ингәс тә ул беҙгә ҡарап алды, ләкин йөҙө .. үҙгәрмәне. Беҙҙең инеү-инмәүебеҙ, күрәһең, уның өсөн бер тин дә тормай.* С. Агиш. **Бото бер тин** бер тингә торошһоҙ. *Большевиктар әйтә: «Нәҫел-нәсәп, турәлектең бото бер тин»,— тип.* Ш. Бабич. **Ике тин — бер аҡса** *кар.* **аҡса.**

**ТИНЛЕК** *и.* Нисәләр тингә торошло аҡса. *// Өс тинлек дәфтәр. Ун тинлек китап.* ■ *[Кейәү егет] ун тинлек, ун биш тинлек көмөш тәңкәне сынаяҡ аҫтына һалып түңкәрҙе.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Бер** (*йәки* **һуҡыр**) **тинлек тә** бер ҙә, һис тә. *Был һүгыштың беҙгә һуҡыр тинлек тә файҙаһы юҡ.* Д. Юлтый.

● *Биш тинлек ҡуян, ун тинлек зыян.* Мәҡәл.

**ТИНМӘ-ТИН** *р.* Һәр тиненә тиклем. *[Айгуганов] колхозсыларҙың күпме эш хаҡы алғанын тинмә-тин әйтеп бирҙе.* Н. Мусин.

**ТИНТЕРӘҮ** *к. диал.* Ҡаңғырыу. *Тинтерәп йөрөү.*

**ТИНТӘК** *с. диал.* Ахмаҡ, тиле. *Тинтәк кеше.*

**ТИНТӘКЛӘНЕҮ** *к. диал.* Тиләләнеү.

**ТИҢ** I *с.* **1.** Ара, ваҡыт кимәле күпмегәләр тигеҙ. *Бер метрға тиң оҙонлоҡ. Быуатҡа тиң ғүмер. // Тиң булып тороу. Тиң итеп ҡырҡыу. Тиң үҫеү.* ■ *Ҡуш аяҡҡайҙарын тиңдәр баҫып, яуап бирә Насир түрәгә* (Халыҡ йырынан). **Бер тиң** оҙонлоҡҡа, бейеклеккә бер. *Йорттан алты йәшлек егермеләгән бала килеп сыға. Улар барыһы ла бер тиң, ти* (Әкиәттән).

**2.** Күләм, дәүмәл яғынан тигеҙ. *Тиң ауырлыҡ. Тиң ирек. Тиң хоҡуҡ.* ■ *Әҙәмдәрҙән әҙәм ай кәм түгел, тик бәхеткәйҙәре тиң түгел* (Халыҡ йырынан).

**3.** Йәш яғынан тигеҙ, йәшкә бер; йәштәш. *Зәлифә йәш яғынан үҙәнә тиң еңгәһен яҡын күрҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Эш, сифат, дәрәжә яғынан тигеҙ, берҙәй. *Тиң күреү. // Кем менәндер тиң эшләү.* ■ *Ерҙә*

*ниндәй генә гөл үҫмәһен, тиң була алмаҫ беҙҙең гөлдәргә.* М. Хәй. *[Алпамыша:] Малһыҙ егет, һанһыҙ егет хан ҡыҙына тиң буламы?* «Алпамыша». *Тиңдәрең дә менән тиң тормағас, донъя малы күҙгә күренмәй* (Халыҡ йырынан).

II *и.* **1.** Бер үк йәштәге кеше; тиңдәш. *Хәтерләтеп торһон һиңә, улым, һинең тиңдәргә: атайҙарҙың йөгө, ил яҙмышы күсә бара һеҙҙең иңдәргә.* Ш. Бикҡол.

**2.** Эш, сифат, дәрәжә яғынан бер кимәлдәге кеше йәки нәмә; тиңдәш. *Тиңеңә барыу. Тиңең менән йәшәү. Эштә тиңе юк.* ■ *Был гүмерҙең һәм был шатлыктың тапманым мин тиңен.* Х. Ҡунаҡбай.

**3.** 3-сө зат эйәлек һәм сгн. клш. аффиксы менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*кар.* **тиңенән**).

● *Тиң тиңе менән, тинтәк тиле менән.* Әйтем.

**ТИҢДӘШ** *и.* **1.** Йәш яғынан тиң кешеләр; тиң[2]. *Тиңдәш менән осрашыу. // Тиңдәш ҡыҙ.* ■ *[Сәлихтең] ҡайтҡанына бер нисә көн үтеүгә ҡарамаҫтан, уҙ тиңдәштәре, балалыҡ иптәштәре менән ныҡлап һөйләшкәне юҡ.* С. Агиш.

**2.** Эш, сифат, дәрәжә яғынан бер-береһенә бәрәбәр кеше йәки нәмәләр; тиң[2]. *Тиңдәш менән ултырыу. // Ыласынға тиңдәш ир.* ■ *Урал тиңдәше юк батыр егет булып үҫеп киткән.* «Урал батыр». *Тирә-яҡта дан тоткан был һунарсы. Уға тиңдәш сыкмаған* (Әкиәттән).

**ТИҢДӘШҺЕҘ** *с.* Эш, сифат йәһәтенән тиңе юҡ; тиңһеҙ. *Тиңдәшһеҙ батырлыҡ. Хәҙер ул [Рахман] үҙен тиңдәшһеҙ ҙур задание алырға барған төҫлө тойҙо.* Ә. Вәли.

**ТИҢЕНТЕ(Н)** *бәйл.* Төп һәм төбәү килештәге һүҙҙәр менән килеп, бейеклек, оҙонлоҡ яғынан сағыштырма кимәлде белдерә. *Бил тиңенте кар ята.* ■ *Бала-сага балаҡтарын тубыҡ тиңентен төрөп, гөрләүектә ҡарап йөҙҙөрә.* Ш. Бикҡол.

**ТИҢЕНӘН** *бәйл. функцияһында кар.* **тиңентен.** *Бил тиңенән үҫкән үлән. Һыу кукрәк тиңенән булды.*

**ТИҢКЕ** *бәйл. диал.* Тиклем.

**ТИҢКЕТЕҮ** *к.* Иҫ, аңды томалау. *Башты тиңкетеү.*

**ТИҢКЕҮ** *к. иҫк.* Аң томаланыу. *[Иртуғандың] бөтә тәнә йөрәккә тейеп һыҙлай, башы тиңкегән, колағы шаулай.* А. Таһиров.

**ТИҢЛЕ** *бәйл.* Төп килештәге исем һәм эйәлек алмашы менән килеп, күләм, дәүмәлгә сағыштырғанда ҡулланыла; тиклем, ҡәҙәр. *Алһыу күршенән үҙе тиңле бәләкәс ҡыҙ эйәртеп ҡайтҡан.* С. Агиш.

**ТИҢЛЕК** *и.* Тиң хоҡуҡҡа нигеҙле мөнәсәбәт. *Тиңлек биреү. Тиңлек яулау.* ■ *[Юлдыкай:] Ярлылар тиңлек алдыҡ, беҙгә был әйләнде шатлыҡ!* Х. Ғәбитов.

**ТИҢЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **тиңләү.**

**ТИҢЛӘҮ** *к.* **1.** Тәңгәл урынлашытырыу, тәңгәл итеү. *Беҙ ат башына ат тиңләп, кем уҙарҙан финиш һыҙығын үтеп китәбеҙ.* С. Кулибай.

**2.** Тиң кимәлгә килтереү; тиң итеү. *Бағана баштарын тиңләү.*

**3.** Эш, сифат, дәрәжә йәһетенән сағыштырып, тиң ҡуйыу; тиңәү.— *Самсон әфәнде, яныйым, тип яҙыр инем, тиңләмәҫһең, тип ҡурҡам.* Т. Йәнәби. *Әҙәпһеҙлек түгелме был ҡылғаның? Ишаккә тиңләйһегеҙ ир толпарын!* Аҡмулла. *Айга ла гына көнгә тиңләмәйем, һылыулығың, Шәүрә, шул саклы* (Халыҡ йырынан).

**ТИҢЛӘШЕҮ** *к.* **1.** Тәңгәл урынлашыу, тәңгәл булыу. *Билдәле урында тиңләшеп, сабыша башла[нылар]* (Әкиәттән). /Ни менәндер тиң кимәлгә килеү. *Көнгә төн тиңләшкән ваҡыт.*

**2.** Буйҙы сағыштырып үлсәү. *Икәүләп тиңләшеү.* ■ *Һуңғы үлсәшкәндән һуң байтак .. үҫкәнбеҙ булып сыкты. Әптерәй миңә тиңләшә яҙған.* Й. Солтанов.

**3.** Күләм, дәүмәл, эш, сифат йәһәтенән тиң хәлгә килеү. *Маһайған ул [дала]: «Диңгеҙ үҙе хатта тиңләшә алмай минең киңлеккә».* Ғ. Әмири. *Сер һаҡлай белеүгә китһә, балыксылар менән бәрәү ҙә тиңләшә алмаҫ.* Ә. Чаныш.

**ТИҢЛӘШТЕРЕҮ** *к.* **1.** Тәңгәл урынлаштырыу, тәңгәл итеү. *Йүгеректәрҙе тиңләштереп ҡуйыу.*

**2.** Буйҙы сағыштырып үлсәтеү. *Балаларҙы тиңләштереү.*

**3.** Эш, сифат, күләм, дәүмәл йәһәтенән тиңме-түгелме икәнен белеү өсөн үҙ-ара мөнәсәбәткә ҡуйыу; сағыштырыу. *Эш һөҙөмтәһен тиңләштереү.* ■ *Орлоҡ таҙартыу һан яғынан ни тиклем ныҡ артһа ла Башҡортостанда сәселгән бөтә орлоҡ менән тиңләштергәндә бик әҙ булып ҡала әле.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**ТИҢ-ТОШ** *и. йыйн.* **1.** Бер йәштәге кешеләр. *Беҙ һуңғы йылдарҙа булып үткән хәл-ваҡиғалар, тиң-тоштар тураһында оҙаҡ гәпләшеп ултырҙыҡ.* С. Кулибай.

**2.** Бер дәрәжәләге яҡын кешеләр; дуҫ-иш. *Көрәгәләр алып, ҡымыҙ эсеп, тиң-тош менән йәшәр көн бармы икән* (Халыҡ йырынан).

**ТИҢҺЕҘ** *с.* **1.** Эш, сифат йәһәтенән тиңе юҡ; тиңдәшһеҙ. *Тиңһеҙ алыш. Тиңһеҙ батырлыҡ. Тиңһеҙ матур сәскә.* ■ *Салауат тиңһеҙ арыҫлан, арыҫландай алышҡан, уғы алған алыҫтан.* Ш. Бабич.

**2.** Сифат, дәрәжә йәһәтенән тиң түгел. *Елберләпкәй үҫкән зифа буйым тиңһеҙ иргә төшөп, хур булды* (Халыҡ йырынан).

**ТИҢҺЕҘЛЕК** *и.* Хоҡуҡ йәһәтенән тиң булмаған хәл.

**ТИҢҺЕНЕҮ** *к.* Тиң күреү, тиң һанау. *[Мәрйәм:] Ауылда сакта артымдан йөрөмәгән егет булманы. Береһен дә тиңһенмәнем, ялындырған булдым.* Ш. Янбаев.

**ТИҢҺЕТЕҮ** *к. диал.* Тиңләү. *Мин был фекерҙе уҙ кисерешемә тиңһетеп баһалайым.* С. Кулибай.

**ТИҢӘЙЕҮ** *к. кар.* **тиңәлеү.**

**ТИҢӘЛЕҮ** *к.* **1.** Бер кимәлгә, бер тәңгәлгә килеү; тиңләшеү. *Бер сал кая[ға] .. тиңәлгәс, һыбайлылар туктаны.* Й. Солтанов.

**2.** Күләм, дәүмәл, эш, сифат йәһәтенән тиң хәлгә килеү; тиңләшеү. *Бәпкәләр оло ҡаҙға тиңәлеп килә.* ■ *Йәш йөрәктә йәш дәрт, беләктә көс, ҡаршы көстәр уға тиңәлмәҫ.* Ғ. Амантай.

**ТИҢӘҮ** *к.* Эш, сифат йәһәтенән сағыштырып, тиң ҡуйыу; тиңләү. *Вася уйлана, ләкин уны [каланы] тиңәрлек ауыл белмәй.* Һ. Дәүләтшина.

**ТИҢӘШЕҮ** *к. кар.* **тиңләшеү.**

**ТИП** [1] [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Билдәле бер төркөмгә тура килгән өлгө, төр. *Самолёт тибы. Яңы типтағы партия.* ■ *Тарихта социаль революцияның өс тибы билдәле.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 4 февраль.

**2.** *биол.* Тереклек системаһындағы ҡәрҙәш кластарҙы берләштергән иң юғарғы төркөм. *Быуынтыҡ аяҡлылар тибы. Сәскәле үҫемлектәр тибы.*

**3.** Кешенең этник сығышына бәйле физик үҙенсәлек. *Кавказ тибындағы кеше.*

**4.** Үҙенсәлекле һыҙаттар буйынса берләшкән кешеләр төркөмө. *Бар шундай ҙа типтар: ҡарайһың да: «Вот коммунист,— тиһең,— хас ялҡын!»* Р. Сафин.

**5.** *әҙ.* Айырым кеше төркөмөнөң уртаҡ һыҙаттарын дөйөмләштергән әҙәби шәхес.

**ТИП-** *киҫ.* **Ти**⸗ ижеге менән башланған төп сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһе бирә. *Тип-тигеҙ. Тип-тиң.*

**ТИПА́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Типтар йыйымы. *Самолёттар типажы. Тракторҙар типажы.*

**2.** Ижтимағи төркөмгә хас үҙенсәлектәр йыйымы. *Социаль типаж.*

**ТИПАРАЙ** *с. диал. кар.* **төпөш** [1].

**ТИПИК** *с.* **1.** Әҙәби типҡа тура килешле. *Типик шәхес.*

**2.** Ниндәйҙер типтың үҙенсәлектәренә эйә. *Типик башҡорт. Типик лирик сопрано.*

**3.** Кем йәки нимә өсөндөр тәбиғи; йыш осраусан. *Типик хата.*

**ТИПИКЛАШТЫРЫУ** *к.* **1.** Билдәле бер типҡа яраҡлаштырыу. *Технологияны типиклаштырыу. Төҙөлөштө типиклаштырыу.*

**2.** Билдәле бер әҙәби типҡа килтереү. *Персонаждың телен индивидуалләштереү С. Агишта сатирик шәхесте типиклаштырыу алымы булып тора.* Ғ. Әбсәләмова.

**ТИПКЕ** [1] *и.* Ишекте, ҡапҡаны эстән бикләй торған арҡыры таяҡ. *Ишеккә типке һалыу.* ■ *Илсебикә, ҡарсыҡтар менән бала-сағаны .. өйҙәрендә ҡалдырып, эстән типке һалдырған да, үҙе әхирәттәрен эйәртеп, тау башына күтәрелгән.* Н. Иҙелбай. *Типкеһен тарткас, оло урыҫ ҡапҡаһы, эс бошоргос шығырлап, әкрен генә асылды.* Т. Килмөхәмәтов.

**ТИПКЕ** [2] *и.* **1.** Аяҡ менән ҡапыл һелтәү хәрәкәте.

**2.** (*йәки* **эт типкеһе**) *күсм.* Кемдер тарафынан ҡыйырһытылған, рәнйетелгән хәл. *Типкелә йәшәү. Эт типкеһендә йөрөү.*

● *Йыуаш аттың типкеһе ҡаты булыр.* Әйтем. *Ат типкеһен ат күтәрер.* Әйтем.

**ТИПКЕ** [3] *и.* Ҡайһы бер ата ҡоштарҙың үксә өҫтөндәге оҙон үткер тырнағы; тибенге. *Ҡәлмәргәндең типкеһе серек ағасҡа инеп китә* (Әкиәттән).

**ТИПКЕЛ** *и. диал.* Типһән.

**ТИПКЕЛӘҮ** *к.* Ҡабат-ҡабат тибеү. *Типкеләп ташлау.* ■ *Ҡуян да килеп тоҡто типкеләп китә, ти* (Әкиәттән).

**ТИПКЕН** *и.* **1.** Тулҡын ҡаҡҡан һыу сите. *Һыу типкенендә ятыу.*

**2.** Быуа һыуының кирегә тибеп, йәйелгән өлөшө. *Быуаның типкене бик алыҫ киткән.* / Ташҡын йылғаның ситкә тибеп сыҡҡан өлөшө.

**3.** *күсм.* Ситтән ҡағылған көслө тәьҫир; ипкен, шауҡым. *Ялҡын типкене.* ■ *[Саматов:] Да, большевиктар типкене һаман йәйелә, көсәйә.* Н. Ҡәрип.

**4.** *диал.* Тибен. *Мал типкенгә сыҡты.*

**ТИПКЕС** *с.* Ҡош, йәнлек типкән йыртҡыс (ҡошҡа ҡарата). *Был шоңҡар шул тиклем типкес булып, бөтә ҡаҙ, туғаҙаҡ, торна һәм бүтән төрлө йәнлекте ҡалдырмай тибә торған булған, ти* (Әкиәттән).

**ТИПКЕСӘ** *и. диал.* Табалдырыҡ.

**ТИПКӘК** *с. диал.* Тибешкәк. *Типкәк ат.*

**ТИПКӘҮ** *и.* Ишек, ҡапҡаны эстән бикләй торған шыуҙырмалы ҡыҫҡа ағас. *Шул арала ишек ҡайырылған да, шартлап һынып киткән типкәүе.* М. Тажи.

**ТИПЛЕГЕҮ** (типлек⸗) *к.* Һыу туңғандан тибелеү (һауыттың төбөнә ҡарата). *Күнәктең төбө типлегә. Мискә типлегә.*

**ТИПЛЫ** *с.* Билдәле бер типҡа ярашлы. *Типлы мәктәп. Типлы проект.*

**ТИПОВО́Й** [*рус.*] *с. кар.* **типлы.**

**ТИПО́ГРАФ** [*рус.*] *и.* Типография хеҙмәткәре, типография эше буйынса белгес.

**ТИПОГРАФИК** *с.* Китап-газета баҫыу эшенә бәйле. *Типографик эш. Типография өсөн тәғәйенле. Типографик шрифт.*

**ТИПОГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Китап, газета-журнал баҫҡан ойошма. *Типографияла эшләү. Типография эшсеһе.*

**ТИПОЛОГИК** *с. кит.* Ниндәй ҙә булһа бер типҡа мөнәсәбәтле. *Типологик айырма. Типологик үҙенсәлек.* / Ниндәй ҙә булһа бер типтың дөйөм үҙенсәлектәрен билдәләүгә мөнәсәбәтле. *Типологик классификация. Типологик метод.*

**ТИПОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кит.* **1.** Нигеҙендә объекттар системаларын бүлеү һәм уларҙы дөйөмләштерелгән модель йәки тип йәһәтенән төркөмләү ятҡан ғилми метод.

**2.** Типологик тасуирлау һәм сағыштырыу һөҙөмтәһе.

**ТИПСЕТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **типсеү.** *Юрған типсетеү.*

**ТИПСЕҮ** *к.* Тоташтырып тороу өсөн эре-эре сәнсеп тегеү. *Күлдәктең билен типсеү.*

**ТИПТЕРЕҮ** [1] *к. йөкм. кар.* **тибеү** 1—3. *Аттан типтереү.* ■ *Күл буйында бер йәш егет ҡарсыға өйрәтә: өйрәк типтерә.* Ш. Шәһәр.

**ТИПТЕРЕҮ** [2] *к.* **1.** Кәйеф-сафа ҡороу. *Типтереп йәшеү.* ■ *Ул [Гәрәй] айҙар буйы Ырымбурҙа типтерҙе, тоҙ күленә барҙы. Ҡасим номерҙарынан сыҡмай эсеп ятты, араҡы менән иҙән йыуҙырҙы.* Б. Бикбай.

**2.** Ғишыҡ тотошоу; йөрөү. *Әхирәттәр .. ситләп үттеләр. Йәнәһе мин һиңә тогро түгел, ҡайтҡан һалдат менән типтерәм.* Х. Ғиләжев.

**ТИП-ТИП** *сакр.* Тауыҡ саҡыра торған һүҙ. *[Бәҙерхаят:] Тип-тип, тип-тип.. Ҡара себешем әллә ҡайҙа булды. Әллә төйләгән типте инде.* И. Абдуллин.

**ТИПТӘР** *и.* Яһаҡ түләшеү шарты менән договор төҙөп, башҡорт еренә килеп ултырған халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе.

**ТИПҺЕН** *и. кар.* **типһән.**

**ТИПҺӘН** *и.* Тау, йылға буйындағы әҙ генә ҡалҡыуыраҡ тигеҙ урын. *Йылға типһәне. // Типһән ер.* ■ *Әхмәҙи һыу буйлап килеп, .. мал утлай торған типһәнгә килеп сыҡты.* Ж. Кейекбаев.

**ТИПӘ-ТИҢ** *с.* Бер тиң, тип-тигеҙ. *Егерме икенсе мартта көн менән төн типә-тиң була.*

**ТИР** [1] *и.* **1.** Тире аҫтындағы махсус биҙҙәрҙән сыҡҡан бөрсөк-бөрсөк һыу. *Һалҡын тир. Шыбыр тир. Әсе тир. Тир биҙе. Тир еҫе. Тир ağа. Тир сыға. Тиргә батыу.* ■ *Маңлай тирен һөртөп еңемә, уркәс-уркәс тауҙар артылдым.* С. Ғәбиҙуллин. *[Мәргән:] Атыңа һыу бөркһәң дә тире ҡатмау — яу көтөү ул һылыуҡай.* «Мәргән менән Маян».

**2.** *диал. кар.* **быуаҡ** [1] 1.

♦ **Арҡа тире** ауыр эш, күп көс. *Минең .. арҡа тире менән табылған мал бит ул.* Б. Хәсән. **Йән тир** *кар.* **йән. [Ҡара] тир түгеү** ҙур көс һалып эшләү. *Ҡола ҡашҡа минең тир түгеп тапҡан берҙән-бер байлығым.* С. Кулибай. **Тир ауырыуы** *кар.* **ауырыу** [2].

● *Маңлайҙан аҡҡан әсе тир табанға төшһә, тоҙ булыр.* Әйтем.

**ТИР** [2] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Сәп ҡуйып, атырға өйрәнә торған урын.

**ТИРА́ДА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Күтәренке тауыш менән әйтелгән телмәр өҙөгө. *Маҡтау тирадаһы. Фашлау тирадаһы.*

**ТИРА́Ж** [1] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Заем йәки лотерея отошоноң уйналыуы. *Дәүләт заемының беренсе тиражы. Тираж таблицаһы. Тираж уткәреү.*

**2.** Заём облигацияларының йәки башҡа ҡағыҙҙарҙың уларҙы сығарған учреждение тарафынан түләнеүе. *Тиражға сыҡҡан облигация.*

**ТИРА́Ж** [2] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Баҫылып сыҡҡан китап һәм газета, журналдың дөйөм һаны; дана. *Газетаның тиражы. Китаптың тиражы.*

**ТИРАЙТЛАУ** *к. кар.* **тиретләү.**

**ТИРАҠ** *с. диал.* **1.** Бөхтә, таҙа. *Тираҡ ҡатын.*

**2.** Егәрле, етеҙ. *Тираҡ кеше.*

**ТИРА́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *тар.* Боронғо Грецияла һәм 13—16 быуаттағы Италияла власты бер үҙе ҡулда тотҡан хаким.

**2.** Ҡылған эштәре законһыҙлыҡҡа һәм йәбергә нигеҙләнгән кеше.

**ТИРАНДАЗ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Уҡсы, атыусы. *Иҙелдең ике тарафынан моҡамәрә өсөн уҡ аттылар, һәр икеһе бигәйәт тирандаз әмирҙәр ине.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ТИРАНИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кар.* **тиранлыҡ.**

**ТИРАНЛЫҠ** *и.* **1.** *тар.* Тирандың үҙе генә хәл итә торған сикләнмәгән власына нигеҙләнгән идара.

**2.** Законһыҙлыҡҡа һәм йәбергә нигеҙләнгән идара.

**3.** Золом, ҡатылыҡ, йәбер.

**ТИРБӘЛДЕРЕҮ** *к.* Ян-яҡҡа талғын ғына сайҡалдырыу; тирбәлтеү. *Тын һауаны сиртеп, тирбәлдереп, шыңғырап аҡты һинең йырҙарың.* С. Кинйәкәй.

**ТИРБӘЛЕҮ** *к.* Ян-яҡҡа талғын ғына сайҡалыу; бәүелеү. *Пароходтар Иҙел буйлап бара, бөҙрә тулҡындарҙа тирбәлеп.* Ғ. Сәләм.

**ТИРБӘЛЕШ** *и.* Тирбәлеү хәрәкәте. *Маятник тирбәлеше. Тауыш тирбәлеше.*

**ТИРБӘЛЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **тирбәлеү.**

**ТИРБӘЛТЕҮ** *к.* Ян-яҡҡа талғын ғына сайҡалтыу; тирбәлдереү, бәүелтеү. *Ел ағасты тирбәлтә.*

**ТИРБӘНЕҮ** *к. кар.* **тирбәлеү.**

**ТИРБӘТЕҮ** *к.* **1.** Ян-яҡҡа талғын ғына йөрөтөү; сайҡалдырыу. *Күргәнем бар ҡырҙар тирбәткәнен алтын башаҡтарҙың диңгеҙен.* Р. Ниғмәти. */күсм.* Йөрәк, күңелде татлы кистәр менән наҙлау. *Бөркөү таң тынлығы юғалды, таң тынлығы һуңынан яңғырап торған йән тирбәткән хаят уянды.* Ғ. Амантай.

**2.** *диал. кар.* **бәүетеү** 1. *Баланы тирбәтеү.*

**ТИРБӘҮ** *к. кар.* **тирбәтеү.**

**ТИРГӘЛЕҮ** *к. төш. кар.* **тиргәү.** *Кешенән тиргәлеү.* ■ *Маҡталаһың, тиргәләһең дә ул — донъя булғас төрлө саҡ була.* Н. Нәжми.

**ТИРГӘНЕҮ** *к.* Үҙ алдыңа кемде йәки ниҙелер тиргәү. *Үҙе [Миңьян] һаман: «Әхмәт сволочь ул,— тип,— үсен алды ул ..»,— тип тиргәнә.* Ғ. Сәләм.

**ТИРГӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **тиргәү.** *Кешенән тиргәтеү.*

**ТИРГӘҮ** *к.* Ҡаты шелтә һүҙҙәре әйтеп ҡыҙҙырыу; әрләү. *Мең бәлә менән атты ҡыуып алып ҡайтам. Шул тиклем аҙап менән йөрөп ҡайтҡас, улар: «Ниңә шул тиклем оҙаҡ йөрөнөң, ялҡау»,— тип тиргәйҙәр.* М. Ғафури.

● *Әкрен йөрөһәң, бай тиргәй; шәп йөрөһәң ат тирләй.* Әйтем.

**ТИРГӘШ** *и.* Кешеләрҙең ҡара-ҡаршы ҡаты һүҙ әйтешеүе; талаш. *Стенаһын ҡалын һалғандар ишетмәҫкә кеше тиргәшен.* С. Ҡудаш.

**ТИРГӘШЕҮ** *к.* **1.** Ҡара-ҡаршы ҡаты һүҙ әйтешеү; әрләшеү. *Икәүләп тиргәшеү.*

**2.** *диал.* Тиргәү.

**ТИРҘЕГГӘН** *и. диал. кар.* **арпа** [2].

**ТИРЕ** [1] *и.* **1.** Кеше һәм йәнлек, ҡош тәнен күп булып тыштан ҡаплаған ҡатлам. *Бит тиреһе. Маңлай тиреһе.* ■ *Урман батыр тырыша торғас, бүрәнә араһынан бармағын тартып алған, ә бармаҡ тиреһе һыҙырылып ҡалған* (Әкиәттән).

**2.** Йәнлек, хайуандың тунап алған тышҡы көбө. *Айыу тиреһе. Бәрәс тиреһе. Ҡуян тиреһе. Төлкө тиреһе, һарыҡ тиреһе. Тире иләү. // Тире тун.* **Сей тире** яңы һуйылған тире. *Мулланың шәригәте лә шул — сей тире һымаҡ, ҡайҙа теләһә, шунда һуҙыла.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Ете ҡат тирене тунау** *кар.* **тереләй тирене тунау.**— *Революцияға тиклем ул — миллионер. Башҡорт ауылдарында халыҡтың ете ҡат тиреһен тунаған.* С. Агиш. *[Браун:] Был азатлыҡ йондоҙо.. Миндә ошо йондоҙҙо тапһалар, .. ете ҡат тиремде тунарҙар.* Ғ. Ғүмәр. **Йоҡа тиреле** *йәки* **тиреһе йоҡа** эшкә, ауырлыҡҡа сыҙамһыҙ кешегә ҡарата әйтелә.— *Хәҙерге йәштәр .. әммә йоҡа тиреле булып үҫә! Беҙ һинең кеүек сакта .. иртә таңдан тора инек тә, ҡояш байығанса эшләй инек.* С. Агиш. **Ҡалын тиреле** *йәки* **тиреһе ҡалын** эш өсөн бошмаҫ, әйткән һүҙгә ыжламаҫ кешегә ҡарата әйтелә. **Тереләй тирене тунау** ныҡ яфалау, яҙалау. **Тире ҡалынайыу** *шелт.* әрһеҙ, бешегә әйләнеү. *Әлекке дүрт уҡытыусы бында күп йылдар уҡытып, тиреләре ҡалынайып*

*бөткән. Ете йыллык мәктәп асыуға ла улар бик һалҡын ҡарай.* Ә. Вахитов. **Тирегә һыя алмау** (*йәки* **һыймаҫтай булыу**) ныҡ үртәнеү, үрһәләнеү. **Тире тартыу** тирене ирәк менән ҡырыу; ирәкләү. **Тире тартҡыс** *кар.* **ирәк. Энә менән тирене тунау** *кар.* **тереләй тирене тунау.**

● *Ҡуяндың тиреһе эт өргән һайын йыртыла.* Әйтем.

**ТИРЕ** [2] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. грам.* Оҙон горизонталь һыҙыҡ рәүешендәге тыныш билдәһе [ — ]; һыҙыҡ. *Тире ҡуйыу.*

**ТИРЕ** [3] *бәйл. диал.* Тиклем. *Тауға тире.*

**ТИРЕГЕҮ** (тирек*г*) *ҡ.* Тир һеңеү. *Тиреккән кейем.*

**ТИРЕЛЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. кар.* **тиреү** 1. *Йәнәшә ултырған өс ағас та тирелеп бөтмәне, Хөрмәттең һауыты өймәләм булды.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Тоташҡан, береккән ерҙән өлөш-өлөшкә айырылыу; таралыу. *Һал тирелә.* ■ *Ҡыҙҙар аҡ булатты ике ҡуллап күтәреп, йән көскә сабып ебәрә — сей тимерҙәр онталып, бығауҙар тирелеп төшә.* «Алпамыша».

**ТИРЕМ** *бәйл. диал.* Тиклем. *Кискә тирем.*

**ТИРЕСЕ** *и.* **1.** Тире иләү оҫтаһы.

**2.** Тире йыйыусы.

**ТИРЕСӘ** *и.* **1.** Тән ағзаларының эске яғындағы йоҡа ғына тире. *Ауыҙ эсендәге тиресә. Танау эсендәге тиресә. Лайлалы тиресә.*

**2.** Үҫемлек япрағының тышҡы ҡатламы.

**ТИРЕҪ** [1] *и.* Тиҙәк менән һандыҡ бесән һәм һалам ҡатнашмаһы. *Серегән тиреҫ. Тиреҫ өйөү. Тиреҫ түгеү. Тиреҫ таратыу. Тиреҫ сығарыу.* **Ҡара тиреҫ** янған, серегән тиреҫ.

**ТИРЕҪ** [2] *и.* Көньяҡҡа ҡаршы тараф; төньяҡ. *Тиреҫ еле.* ■ *Тиреҫтән көслө һалҡын ел иҫә, бысҡаҡлап ямғыр яуа.* Ж. Кейекбаев. // *Тиреҫ яҡтан һалҡын ел иҫә.* Ғ. Ғүмәр.

**ТИРЕҪ** [3] *с.* Төп яҡҡа ҡаршы; кире. *Тиреҫ йүнәлеш. [Кире аҙамат] яҡшылыҡҡа тиреҫ алып, яғанан алып һелкетер* (Ҡобайырҙан).

**ТИРЕҪЛЕК** *и.* Тиреҫ түккән, тиреҫ түгә торған ер.

**ТИРЕҪЛӘНЕҮ** [1] *ҡ. төш. кар.* **тиреҫләү.** *Тиреҫләнгән ер.*

**ТИРЕҪЛӘНЕҮ** [2] *ҡ. иҫк.* Кире ҡыланыу; кирелләнеү, ҡарышыу. *Кире аҙамат йорт көтһә, кирелләнеп, тиреҫләнеп, ил йөҙөнә төкөрөр* (Ҡобайырҙан).

**ТИРЕҪЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. кар.* **тиреҫләү.** *Тупраҡты тиреҫләтеү.*

**ТИРЕҪЛӘҮ** *ҡ.* Тиреҫ менән ашлау. *Тупраҡты тиреҫләү.* ■ *[Ғатаулла:] Ҡасандан бире алма баҡсаһына тиреҫ килтерә алмайым. Бөтәһе лә тиреҫләй. Мин тиреҫләй алмайым.* Р. Ғабдрахманов.

**ТИРЕТ** *и.* Һүҙһеҙ таҡмаҡ.

**ТИРЕТЛӘҮ** *ҡ.* Тирет әйтеү, һүҙһеҙ таҡмаҡлау. *Тиретләп бейетеү.*

**ТИРЕҮ** *ҡ.* **1.** Үҫеп ултырған емеш-еләкте сүпләп йыйыу. *Бөрлөгән тиреү. Еләк тиреү. Көнбағыш тиреү. Ҡарағат тиреү. Муйыл тиреү.* ■ *Был балалар урманға күнегә башлаған, төрлө емеш тиреп ашаған, ҡош аҡкан* (Әкиәттән).

**2.** Тәртип менән бер-береһенә тоташҡан нәмәләрҙе тарҡатыу; таратыу. *Һалдаттар килеп, өйҙө тиреп тә ташлаған* (Хикәйәттән).

**ТИРЕШЕҮ** *ҡ. урт. ярҙамл. кар.* **тиреү** 1. *Ҡарағат тирешеү.*

**ТИРЕ-ЯРЫ** *и. йыйн.* Һәр төрлө тире. *Тире-яры йыйыу.* ■ *Былар [Ғәлиҙәр] туҡтаған ерҙә ит, май, тире-яры кеүек нәмә һатырға килгән ауыл кешеләренең иҫәбе лә юҡ ине.* М. Ғафури.

**ТИРЛЕ** *с.* Тире сыҡҡан, тирләгән. *Тирле ат. Тирле бит.*

**ТИРЛЕК** *и.* Эйәрҙең үңлеге аҫтынан һалына торған кейеҙ.

**ТИРЛӘП-БЕШЕҮ** *ҡ.* Ныҡ тирләү. *Тирләп-бешеп сәй эсеү.* ■ *Сәлмән эшләй, тирләп-бешеп ҡаҙа, ә Ҡәмән менән Сәмән ҡояшта ҡыҙына, ти* (Әкиәттән).

**ТИРЛӘТЕҮ** *ҡ.* **1.** Тиргә төшөрөү. *Атты тирләтеү.*

**2.** *эйһ. ф. кар.* **тирләү** 1. *Эҫелә йәйәү атлап, тирләтте.*

**ТИРЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Тир сығып, тирле булыу; тиргә төшөү. *Аяҡ тирләй. Арҡа тирләй. Ҡул тирләй. Тирләгәнсә эшләү.* ■ *Ҡаҙанда аш бешереп маташҡан ҡатын эҫегә тирләгән битен алъяпҡысы менән һыпырҙы.* Я. Хамматов. *Тарығып биргән һыйыңдан тирләп тапҡан аш артыҡ* (Ҡобайырҙан).

**2.** *диал. кар.* **быуаҡланыу** [1]. *Тирләгән тәҙрә.*

**ТИРЛӘШЕҮ** *ҡ. урт. кар.* **тирләү** 1. *Тирләшеп сәй эсеү.*

**ТИРМӘ** *и.*, **тирмә өй** Таратып-йыйып алмалы еңел кейеҙ өй. *Тирмә кейеҙе. Тирмә кирәгәһе.* ■ *Ныязгол .. ер кибеп, үлән сәскә атҡас ҡына йәйләүгә сыға. Тирмә ҡороп ебәрә лә, шунда ҡымыҙ эсеп, йәй үткәрә.* Һ. Дәүләтшина.

**ТИРМӘН** *и.* **1.** Ашлыҡ тарта торған предприятие һәм шулай итеп тартыу өсөн йәйланмалары булған бина. *Пар тирмәне. Һыу тирмәне. Тирмән ташы. Тирмән быуаһы. Тирмәнгә барыу. Тирмән тартыу. Тирмәндә эшләү.* ■ *Ел тирмәне елпеү елдәргә ҡанаттарын болғап әйләнә.* Ғ. Амантай. **Ҡул тирмәне, таш тирмән** ҡул менән әйләндереп ашлыҡ тарта торған, ғәҙәттә ике түңәрәк таштан ғибәрәт ҡорал. *Таш тирмәнде өйрөлдөрөү талдыра икән беләкте* (Халыҡ йырынан). **Тирмән ташы** тирмәндең түңәрәк таштан ғибәрәт, ашлыҡты иҙеүгә, ваҡлауға нигеҙ булған өлөшө.

**2.** Берәй төрлө орлоҡтарҙы, ашлыҡты тартыу, онтау өсөн булған йәйланма, машина. *Кофе тирмәне.*

♦ **[Кемдеңдер] тирмәненә һыу ҡойоу** кемдеңдер файҙаһына эш итеү. **Тел менән тирмән тартыу** *кар.* **тел** 2. **Тирмәне шап тарта** ашарға шәп, тигән мәғәнәлә әйтелә.

**ТИРМӘНСЕ** *и.* Тирмән тотҡан йәки тирмәндә эшләгән кеше. *Тирмәнсе булып эшләү.*

**ТИРСЕЛ** *с.* Тирләп барыусан, тиҙ тирләүсән.
● *Кеше малы тирсел, кеше кейеме керсел.* Әйтем.

**ТИРСӘН** *с. кар.* **тирсел.**

**ТИРҪАЯҠ** *и.* Аяғы ныҡ артта, бармаҡ ара һы ярыһыҙ сумғыс өйрәк.

**ТИРТЕНЕҮ** *ҡ.* Тулышыу, тиртеү. *Һыйырҙың елене тиртенеп киткән.*

**ТИРТЕҮ** *к.* **1.** Һөт йыйып, тулышыу; ташыу. *Елен тиртә. Имсәк тиртә.* ■ *Кукрәге тиртеп, һыҙлай башлаған сакта Фатима улын .. һағынып иҫенә төшөрөр ине.* Ж. Кейекбаев. / Йыйылып, тулышыу. *Күҙгә йәш тиртә. Йылға тиртә.* ■ *Сөйөмбикәнең битенә ҡайнар ҡан тиртте.* Ш. Янбаев.

**2.** Тулышып ҡабарыу; бүртеү. *Тирткән бөрө. Тирткән орлоҡ.*

**3.** Әҙ генә тибеп ҡалҡыу. *Тиртеп сығыу.* ■ *Йәш үлән зәгиф кенә булып тиртеп, баш калҡытып килә.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТИРТТЕРЕҮ** *к.* Һөткә тулыштырыу. *Имсәктәрен тирттереп һыйырҙар ҡайта.* Я. Хамматов.

**ТИРӘ** *и.* **1.** Әйләнәләге ер; урата. *Макар тирәне күҙәтеп тороусыларҙан хәлде белеү өсөн .. һыҙғырҙы.* А. Таһиров. *Иптәштәр ҙә пристань дә ҡалғас, төн тартылды тағы ла тирәгә.* Ғ. Сәләм. / Нимәгәлер яҡын ер, ниҙең дә булһа яҡын әйләнәһе. *Ауыл тирәһе. Күҙ тирәһе. Күл тирәһе. Кәртә тирәһе. Ҡаҙан тирәһе. Өй тирәһе. Усаҡ тирәһе.* ■ *Карап тирәһендә, аждаһалай үргылып, тулҡындар ҡайнай.* З. Биишева. / Дөйөм тормош шарты менән бәйле төркөм; ара. *[Әбей:] Жулик шул йәтим тирәһенән була инде ул. Ата-әсәһе булған бала жулик та булып йөрөмәй.* С. Агиш.

**2.** *бәйл. функцияһында* Төп килештәге һүҙҙәр менән килеп, эш, хәлдең кем йәки нимәгә ҡағылышын белдерә. *Ул һаман һүҙен һыйыр һәм май тирәһендә йөрөтә.* Т. Йәнәби. *Аш-һыу тирәһенә бик тәрбиәле ҡатын ул Әскәп.* Б. Бикбай. / Күләм, дәүмәл самаһын белдерә. *Ай тирәһе. Бер бот тирәһе.* ■ *[Михаил:] Ошо айҙың ун биштәре тирәһендә мин һиңә хәбәр итермен.* Һ. Дәүләтшина. *Фронттан 40-50 сакрым тирәһендә әйләнәбеҙ.* Д. Юлтый.

**ТИРӘ-ЙҮН** *и.* **1.** Яҡын тирә, әйләнә тирә; тирә-яҡ. *Тирә-йүнде ҡарау.* ■ *Димдең ике яҡ ярында тирмә ҡороp урын да ҡалмай. Тирә-йүн аҙналар буйы шау-шыу, ығы — зығы килеп тора.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** Кешене уратып алған донъя, мөхит. *Улар тирә-йүн хәлен полк командиры менән бер дәрәжәлә белә ине.* С. Кулибай.

**ТИРӘК** *и.* **1.** Һыу буйында үҫә торған йәшкелт буҙ ҡабыҡлы, өскөләрәк япраҡлы бик эре ағас.— *Ә мин тирәкте күберәк яратам,— тине Юлдаш. ..— Бына ул ниндәй бейек. Олоно, ботаҡтары ниндәй ҡеүәтле, мөһабәт. Япраҡтары ла уның йәй көнө көмөш тәңкәләр кеүек ялтырап, һәр ваҡыт елберләп кенә тора.* З. Биишева. *Тирәктең ап-аҡ мамыҡҡа сумып ултырған мәле. Ботаҡҡа турғай килеп ҡунһа ла ҡар бураны өйөрөлгәндәй була.* Р. Ғабдрахманов. *Аҫыл да тирәк — күк тирәк яланда үҫмәй, ярҙа үҫә* (Халыҡ йырынан). **Аҡ тирәк** аҡһыл йәшел ҡабыҡлы, түңәрәгерәк оҙонса япраҡлы бик эре ағас.

**2.** *һөйл.* Эре ағас.

◆ **Аҡ тирәк, күк тирәк** балалар уйыны (тотоношоп, ике төркөм ҡара-ҡаршы теҙелеп тора; ике төркөмдөң береһе: «Аҡ тирәк, күк тирәк, беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?» — тип ҡысҡыра; икенсе төркөм бер баланың исемен әйтә; исеме әйтелгән бала йүгереп барып тегеләрҙең араһын өҙөргә тырыша; өҙһә бер баланы үҙ төркөмөнә алып ҡайта, өҙә алмаһа — үҙе шунда ҡала; ҡайһы төркөм бара-бара бөтә — шул еңелә).

**ТИРӘКЛЕК** *и.* Тирәк күп үҫкән урын.

**ТИРӘЛӘЙ** *бәйл.* Төп килештәге һүҙҙәр менән килеп, эш-хәрәкәттең кем йәки ниҙеңдер әйләнәһендә булыуын белдерә. *Булмә иркен, оҙон өҫтәл тирәләй ултырғыстар ҡуйылған.* С. Кулибай. *Ҡараңғы төшөү менән ҡыуыш алдына ут яҡтылар. Ураҡсылар, ут тирәләй ултырып, әңгәмәләшә ... башла[ны].* М. Тажи.

**ТИРӘЛӘТЕҮ** *к.* Кем йәки ниҙеңдер тирәһенән әйләндереү. *Өй тирәләтеп ағас ултыртыу.*

**ТИРӘЛӘҮ** *к.* **1.** Кемде йәки ниҙелер тирәһе буйлап әйләндереү; уратыу. *Әбйәлил атты йәһәт кенә менеп алған да күлде тирәләп сабып сыҡҡан* (Әкиәттән). *Күл ситкәйҙәре лә эй түңәрәк, тирәләп тә оса күбәләк* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Тирәһендә йөрөп, кемделер әүрәтергә тырышыу.— *[Мәхмүзә] беҙҙең Ғибаҙулланы тирәләй. Тегенеһенең бер ҙә иҫе китмәй булһа кәрәк. Ундай ҡулынан эш килмәҫ ҡыҙҙарға егеттәр ҙә бик йығылып бармай шул.* Д. Исламов.

**ТИРӘС** *и.* Уратып йәки ҡоршап торған сит. *Иләк тирәсе. Ҡалпаҡ тирәсе. Табаҡ тирәсе.* ■ *Уның [Әхмәттең] өҫтөндә ҡаҙаҡ көпөһө, башында тирәсле бүрек.* И. Көҫәпҡол. *Урман бабай еҙ тирәсле күҙлеген кейеп, ҡағыҙға күҙ йүгертеп сыҡты.* Й. Солтанов.

**ТИРӘСЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **тирәсләү**. *[Өмөтбай] башына бәрәс тиреһе менән тирәсләнгән иҫке тәүәккәл бүрек кейгән.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТИРӘСЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **тирәсләү**. *Иләкте тирәсләтеү.*

**ТИРӘСЛӘҮ** *к.* Тирәс ҡуйыу, тирәсле итеү. *Иләкте тирәсләү. Көҙгөнө тирәсләү.*

**ТИРӘ-ЯҠ** *и.* Әйләнәләге бөтә ер; ян-яҡ. *Тирә-яҡҡа ҡарау.* // *Тирә-яҡ ауылдар.* ■ *Димдең тирә-яғы ҡарағуҫҡыл ҡуйы йәшел урман менән ҡапланған.* С. Агиш.

**ТИС** [*рус.*] *и.* Йылы яҡта үҫә торған мәңге йәшел ылыҫлы, үҙағасы ҡиммәтле һаналған ағас йәки ҡыуаҡ.

**ТИСЕҮ** *и. диал.* Бөлдөргө.

**ТИҪБЕ** [*ғәр.*] *и. дини* Ун берәрҙән айырып, бер епкә теҙгән утыҙ өс төймә (һәр төймә һайын тәүҙә ун бер йәки утыҙ өс тапҡыр «собхан алла», шунан «әлхәмделиллаһ», шунан «аллаһы әкбәр» тип, әйтеп тарталар). *Тиҫбе төймәһе. Тиҫбе тартыу.*

**ТИҪКӘРЕ** *с.* **1.** Тейешле йәки төп тарафҡа ҡаршы, ҡаршы йүнәлештәге; кире. *Тиҫкәре яҡ.* // *Тиҫкәрегә китеү.* ■ *Төндә тиҫкәре ел сыҡты, һыуытып ебәрҙе.* Ә. Вәли. *Тиҫкәренән әсе ел иҫә.* Д. Исламов. *Дошмандарым көлөп шатлана, донъя килгәс миңә тиҫкәре.* Х. Ғәбитов.

**2.** Тейешле, ыңғай хәлгә ҡаршы; кире. *Бөтә тиҫкәре күренештәргә ҡаршы көрәштә һин дә, мин дә ҡатнашырға тейеш.* С. Кулибай. // *Әмеребеҙҙе тиҫкәре типкән өсөн, ергә аттыҡ беҙ быны мәхрүм итеп.* Ш. Бабич.

**3.** Кеше ыңғайына ҡаршы килеүсән, кеше ыңғайлы булмаған; кире. *Тиҫкәре кеше. Тиҫкәре булыу.* ■ *Бик тиҫкәре, үҙ һүҙле, дыуамал кеше тиҙәр Ҡолсобайҙы.* Я. Хамматов. **Тиҫкәрегә**

**бөткән** бик кире ғәҙәтле. *Тиҫкәрегә бөткән кеше.*

**4.** Йөҙ яғына, уң яғына ҡаршы (кейем, ҡаралдыға ҡарата). *Тиҫкәре яҡ.* //*Кейемде тиҫкәре кейеү.* ■ *Ул [Ғәлимә] .. яңы күлдәген кейһә лә тиҫкәре ягын кейгән.* М. Ғафури.

**5.** *мат.* Минус тамғаһы менән билдәләнгән, нулдән түбән. *Тиҫкәре һан.*

**ТИҪКӘРЕЛЕК** *и.* **1.** Тейешле, ыңғай хәлгә ҡаршы хәл, торош; кирелек. *[Хеҙмәт кешеләренең] тырышлығы менән .. ауыр яҙҙың тиҫкәрелектәрен еңеп сыктыҡ.* Ғ. Вәлиев.

**2.** Кеше ыңғайына ҡаршы килеү сифаты; кирелек. *Минең тиҫкәрелегем Урманцевага билдәле ине. Бер-ике һүҙ менән димләп ҡараны ла артыҡ ҡыҫтаманы.* С. Агиш.— *Бөтәһе лә юктан хатта һис тә уйламағанда фәкәт минең тиҫкәрелегем арҡаһында, килеп сыкты,— тип һөйләне Ногманов.* Х. Зарипов.

**ТИҪКӘРЕЛӘНЕҮ** *ҡ.* Кеше ыңғайына ҡаршы ҡыланыу; яйға килмәй, ҡарышыу.— *Ҡарышып, тиҫкәреләнеп, ялкауланып эшкә .. өйрәнеп булмай.* С. Агиш. *Исмәгилдең яуаптары Ғимат Сәлимовичте уйланырга мәжбүр итте. Һис шикһеҙ, һәләтле укыусы. Тыштан гына шулай тиҫкәреләнә.* Я. Вәлиев.

**ТИҪТЕР** *и.* **1.** Йәш яғынан тиң кеше; тиңдәш. *Шул ике арала бер төркөм кеше йыйылып китте. Улар барыһы ла Сөнәгәттең бәләкәй саҡта бергә үҫкән иптәштәре, тиҫтерҙәре ине.* Ж. Кейекбаев. *Заятүләк .. уйын уйнағанда ыҙғыш-фәлән сыкһа, үҙ тиҫтерҙәрен ҡыйратып алып барыр ине, ти.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** *с. мәғ.* Йәш йәки күләм, дәүмәл яғынан тиң. *Тиҫтер малайҙар.* ■ *Бер тиҫтер һыргый ҡарагай — сак күренә остары.* С. Кулибай.

**ТИҪТӘ** [*фарс.*] *и.* Бер үк төрлө нәмәләрҙе унарлап иҫәпләү берәмеге. *Бер тиҫтә йомортка. Ике тиҫтә ҡыяр.* / Ун йылды тәшкил иткән йәш. *Еңел кәүҙәһенә, йәштәрсә баҙыҡ, тигеҙ тештәренә ҡараһаң, уга [Хасбулат олатайга] хатта алты тиҫтәне биреүе лә ҡыйын.* З. Биишева.

**ТИҪТӘЛӘГӘН** *сама һ.* Тер нисә тиҫтә тирәһе. *Тиҫтәләгән йыл һиҙелмәй уҙып киткән.* З. Биишева.

**ТИҪТӘЛӘП** **1.** *сама һ.* Тиҫтә тирәһе, тиҫтәгә яҡын. *Бер заман сыгыр инек беҙ ҡырга дуҫ-иштәр менән, тиҫтәләп «ҡыҙыллы баштар» һәм «дюшестар» менән.* Ш. Бабич.

**2.** *р.* Тиҫтәһе менән. *Беҙ һөйәбеҙ берҙе генә, һеҙ һөйөгөҙ тиҫтәләп* (Халыҡ йырынан).

**ТИҪТӘЛӘРСӘ** *сама һ. ҡар.* **тиҫтәләгән.**

**ТИҪТӘЛӘҮ** *ҡ.* Тиҫтәгә һалыу. *Тиҫтәләп иҫәпләү. Тиҫтәләп бүлеү. Тиҫтәләп һатыу.*

**ТИТАҠАЙ** *с. диал.* **1.** Үпкәсел. *Титаҡай кеше.*

**2.** Ҡыйшанлаҡ.

**ТИТАҠЛАУ** *ҡ. диал.* Һылтыҡлау. *Титаҡлап атлау.*

**ТИТАН** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Боронғо грек мифологияһында: Зевстан еңелеп, ер аҫты батшалығына ырғытылған Уран менән Геяның улдарының береһе.

**2.** *кусм.* Берәй өлкәлә ғәйәт ҙур эш күрһәткән, аҡыл көсө, таланты, эшмәкәрлегенең киң ҡоласлылығы менән үҙенә башҡа айырылып торған кеше. *Ленин тиңдәше юк бөйөк даһи, даһиҙарга даһи, ул — титан.* Х. Ҡунаҡбай.

**3.** Химик элемент, күкшел буҙ төҫтәге ҡыйынлыҡ менән иреүсән еңел металл. *Титан иретмәһе.* //*Титан деталь. Титан калай.* ■ *Титан өҫтәү коросто ныгыраҡ, утка һәм кислотага сыҙамлыраҡ итә.*

**4.** Махсус яйланмаһы булған ҙур һыу ҡайнатҡыс исеме. *Титанда һыу кайнатыу.*

**ТИТАНИК** *с.* Титанға (1, 2 мәғ.) хас, бик ҙур көскә, киң күләмгә, көсөргәнешкә эйә; грандиоз. *Титаник көрәш. Титаник эш. Титаник тырышлыҡтар.*

**ТИТАНЛАУ** *ҡ. диал.* Йыртанлау. *Титанлап йөрөү.*

**ТИТЕК** [1] *и.* Ишек, ҡапҡаны япҡанда, үҙе ҡаптырыла торған бик.

**ТИТЕК** [2] *бәйл. диал.* Тиклем.

**ТИТЕС** *и.* **1.** Тәпе, ҡапҡан кеүек нәмәләрҙе ҡороп, һуҡҡыһын эләктереп ҡуя торған элгәс.

**2.** *диал.* Тәте. *Мылтыҡ титесе.*

**ТИТКЕҮ** *ҡ.* **1.** Ҡыҫып-ҡыҫып тотҡолау; ҡыҫҡылау. *[Нәкиә:] Былай итеп еленен титке, иренмә. Йомшай башлаганса титке. Йомшай башлаһа — эйеүе булыр.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** Ентекләү, төпсөү. *Титкеп һөйләү.* ■ *Аҡназар .. титкеберәк ҡараны ла, ҡайнының ҡола атын таныны.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** *кусм. диал.* Хөрмәтләү, ҡәҙерләү. *Ҡунаҡты титкеү.*

**ТИТУЛ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Юғары ҡатлам вәкилдәренең хужалыҡ итеүгә хоҡуҡ йәки нәҫелдән килгән юғары дәрәжә исеме. *Кенәзлек титулы. Тарханлыҡ титулы.* / *һөйл.* Берәй вазифаның, чиндың атамаһы. *Титул алыу. Титул биреү.*

**2.** *полигр.* Китаптың исеме, авторы, баҫылған йылы, урыны һ. б. ҡуйылған тәүге бите. *Титул бите.*

**3.** *махс.* СССР-ҙа капиталь төҙөлөштәр исемлегенә индерелгән төҙөлөш сметалары исеме.

**ТИФ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Аңды юғалтыу хәленә еткереп, бик ауыр үтә торған бер нисә йоғошло ауырыуҙың дөйөм атамаһы; тир ауырыуы. *Ҡайтмалы тиф. Ҡорһаҡ тифы. Сабыртмалы тиф. Тиф менән ауырыу.* ■ *Аслыҡ арҡаһында таралган тиф дошман пуляһынан кәм ҡырмай гәскәрҙе.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТИХАЙ** *р. диал.* Гел. *Тихай илап ултырыу.*

**ТИХМӘТКӘ** *р. диал.* Тиктомалға. *Тихмәткә рәнйетеү.*

**ТИХМӘТТӘ** *р. диал.* Ҡайһы берҙә, ҡайһы ваҡыт.

**ТИШЕК** I *и.* **1.** Тотош нәмә өҫтөндәге уйылып, соҡорланып йәки үтәнән-үтә асыҡ булып торған урын. *Ботаҡ тишеге. Йоҙаҡ тишеге.* ■ *[Әбүзәр] курай киҫеп алды, ике яҡ осон тигеҙләп ҡырҡты, кабыргаһына тишек яһаны ла, гыжгылдатып уйнап та ебәрҙе.* Я. Хамматов. *Батырҙар карттың юк булган ерен караһа, өңрәйеп торган тәрән бер тишек күргәндәр* (Әкиәттән). / Ҡайҙалыр үтергә, инергә мөмкинлек биргән ошондай асыҡ урын. *Ситән тишеге. Ҡойма тишегенән инеү. Тишектән сыгыу.* /Тын алыу, ишетеү юлдарына ҡарата. *Ҡолаҡ тишеге. Танау тишеге.*

2. Кейем-һалым, һауыт-һабаның бәләкәй булып тыуған тишелгән урыны. *Көйә киҫкән тишек. Ылдырап туҙған тишек. Күнәктең төбөндә тишек бар.* ■ *[Даша] салбар төбөгөндәге тишектәрҙе яманы.* Һ. Дәүләтшина.

II *с.* 1. Нимәләр өҫтөндә уйылып, соҡорланып йәки үтәнән-үтә асыҡ булып торған. *Тишек ҡойма. Тишек ҡапҡас. Тишек төбә.*

2. Туҙған, тишелгән. *Тишек итек. Тишек кейеҙ. Тишек тоҡ.* ■ *Алёша тишек күнәккә дыңғырлатып картуф һала.* З. Биишева.

♦ **Ер тишегенә инерҙәй булыу** *ҡар.* **ер. Инер тишек тапмау** ҡайҙа ҡасырға, ҡайҙа йәшенергә белмәү. **Таң тишегенән** *ҡар.* **таң**[1]. **Тишек ауыҙ** *шул уҡ* **иләк ауыҙ** (*ҡар.* **иләк**). **Тишек һайын сөй ҡағыу** *ҡар.* **сөй.**

● *Йәтим ҡайҙа — һуҙ шунда, тишек ҡайҙа — ел шунда.* Мәҡәл.

**ТИШЕКЛЕ** *с.* Тишек тишеүле, тишеге бар. *Тишекле төймә.*

**ТИШЕК-ТОШОК** I *и. йыйн.* 1. Төрлө ерҙәге тишек. *Тәҙрәнең тишек-тошоғонан ел өрә.*

2. *күсм.* Төрлө мохтажлығы булған, етешмәгән ер. *Кәрәк нәмә күбәйеп киткәс, бер йөк арыштың ғына тишек-тошоҡто бөтәйтә алмаҫын белгәс, ҡунаҡ саҡырыуҙан тағы тайкалып ҡарарға уйлаһалар ҙа, эш барып сығырлыҡ булманы.* Ғ. Дәүләтшин.

II *с.* Тишектәре күп булған. *Тишек-тошоҡ кейем. Тишек-тошоҡ төбә.* ■ *Атлыкса тишек-тошоҡ, һыуыҡ ел уйнай.* Б. Ишемғолов.

**ТИШЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **тишеү** 1. *Тишелгән тәңкә.* ■ *Һалдаттар балаҡһыҙ салбар, корһағы тишелгән гимнастеркалар кейеп, тағы казармаға китә.* Д. Юлтый. *[Булат:] Итегем дә тишелде. .. Был өр-яңы тишекте Гөләйшә инәй күрмәне әле.* К. Кинйәбулатова.

**ТИШЕҮ** *ҡ.* 1. Үтәнән-үтә соҡорлау йәки уйыу, үтә сәнсеү. *Боҙҙо тишеү. Ерҙе тишеү. Тишеп сығыу. Тишек тишеү.* ■ *Ҡыҙҙар беҙ менән сүкеш алып, тәңкәнең бөркөт башынан тишеп, түштәренә таҡты.* Һ. Дәүләтшина. *Ир-егеткәй өсөн ай яуҙарҙа күкрәккәйен тишер йәҙрә юҡ* (Халыҡ йырынан). / Бәләкәй итеп үтәнән-үтә туҙҙырыу (кейемде). *Ботинканың табанын тишеү. Күлдәктең терһәген тишеү.*

2. (*йәки* **ҡолаҡҡа тишеү**) *күсм.* Һүҙ, хәбәр еткереү; белдереү. *[Сәғиҙә:] Анау көндө уйнап ҡына һөйләгәндә Рәшиҙә уға [Зыяға] тишкән, күрәһең, тел төбөндә шул һиҙелә.* М. Тажи.

♦ **Тишерҙәй итеп ҡарау** *ҡар.* **ҡарау**[1]. **Эсте тишмәҫ** ярап торор, артыҡ булмаҫ. *[Хәмзә:] Бүләкте һауынсыларға ғына тимәгән, ул көтөүселәрҙең дә эсен тишмәҫ ине.* Ә. Гәрәев.

● *Һыу тамсыһы таш тишә.* Мәҡәл.

**ТИШКЕЛӘҮ** *ҡ.* Төрлө ерҙән тишеү. *Ҡағыҙҙы тишкеләү. Туҡто тишкеләү.*

**ТИШКЕС** *и.* Тишә, тишек яһай торған ҡорал. *Ағас тишкес. Тимер тишкес.*

**ТИШТЕРЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **тишеү** 1. *Тәҙрә тиштереү. Ҡолаҡты тиштереү.*

**ТОБА** *и.* Һыуҙың ҡолаҡланыңҡырап, аҡмай ятҡан бик тәрән ере; ятыу. *Тобала һыу инеү.* ■ *Кисен ҡомой ҡаптырып, йәрә һалды тобаға. Таңда төшөп ҡараһа, суртан да алабуға.* Р. Ғарипов.

**ТОБАЛ** *и.* Тирмән, сепаратор кеүек нәмәнең файҙаланған өсөн хужаһына бирелә торған өлөш; гәрнис.— *Камалый ағай, тирмән йәмәгәт ҡулына күсә. Инде тобалды кәметәләр.* А. Карнай.

**ТОБОР** *и. диал.* Түҙлек.

**ТОҒРО** *с.* 1. Яҡшы теләкле, саф намыҫлы. *Тоғро кеше. Тоғро булыу. // Тоғро йәшәү. Тоғро эшләү.* ■ *— Эш тә эш тип, ашауҙан яҙа башланың бит инде. Бик тоғроһоң шул, хәйлә тигән нәмәне белмәйһең.* М. Тажи. *Тоғро юлда үлгән ирҙе һеҙ үлек тип әйтмәгеҙ.* М. Ғафури. *[Батша:] Миңә тоғро хеҙмәт итһәң, үҙең теләгән ҡыҙымды бирермен* (Әкиәттән).

2. Ниндәй ҙә булһа эштә, мөнәсәбәттә һ. б. ышаныслы һаналған, хыянат итмәгән. *Тоғро дуҫ. Һүҙгә тоғро булыу. Эшкә тоғро булыу.* ■ *— Бына хәҙер күр инде: тоғро тигән Алпамышаң Әйләр ханға баш һалған.* «Алпамыша». *Һөйгән йәрең тоғро булһа, ғүмерҙәрең рәхәт үтәләр* (Халыҡ йырынан).

3. *иҫк.* Дөрөҫ, тура. *Тоғро һүҙ. Тоғро юл.*

● *Тотолмаған уғры ишандан да тоғро.* Әйтем.

**ТОҒРОЛОҠ** *и.* 1. Дөрөҫ, яҡшы уйҙы, теләкте белдергән сифат; саф намыҫлылыҡ. *Тоғролоҡ күрһәтеү.* ■ *Күпме-күпме тоғролоҡ ҡорбан була ялған менән.* Ш. Бабич.

2. Ниндәй ҙә булһа эштә һ. б. ышанысты һаҡлауға, хыянат итмәүгә ҡоролған мөнәсәбәт. *Революцияға булған тоғролоҡ. Эшкә булған тоғролоҡ.*

**ТОҒРОЛОҠЛО** *с.* Ниндәй ҙә булһа эштә, мөнәсәбәттә һ. б. ышанысты һаҡлаған, хыянат итмәгән. *Тоғролоҡло булыу. Тоғролоҡло кеше.* ■ *[Дилбәр:] Мөхәббәт тоғролоҡло булырға тейеш.* М. Кәрим.

**ТОҘ** *и.* 1. (*йәки* **аш тоҙо**) Аш-һыуҙы тәмләй торған әсе кристиллик есем. *Ваҡ тоҙ. Таш тоҙ. Аштың тоҙо әсе. Икмәктең тоҙо еңел.* ■ *Новиков картуфтың ҡабығын әрсеп, тоҙға манып, ҙур итеп ҡаба ла айырым бер ләззәт менән сәйнәй башлай.* Д. Юлтый.

2. Кислотаның водородын металл алмаштырғандан барлыҡҡа килгән химик есем. *Глаубер тоҙо. Калий тоҙо. Минераль тоҙ.*

♦ **Күҙ тоҙ(ҙай) булыу** *ҡар.* **күҙ.** *Бына ашлыҡ үкереп үҫеп китһә, һинең матур күҙҙәр тоҙ булыр.* Б. Ишемғол. **Ҡанға (*йәки* яраға) тоҙ һалыу** әрнегән өҫтөнә тағы бер нәмә менән нығыраҡ әрнетеү. *[Маянһылыу:] Нимәгә юҡты һамаҡлап, ҡанға тоҙ һалып йөрөйһөң, бысаҡ ҡаҙалғыр.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». **Тоҙ һипкән кеүек йәбешеп ятыу** ҡайҙалыр ныҡ эйәләшеп, китмәй аптыратҡан кешегә йәки ҡош, йәнлеккә әйтелә.

**ТОҘАҠ** *и.* 1. Ҡош, йәнлек тота торған әлмәк. *Тоҙаҡ һалыу.* ■ *Иртәгәһен егет, бер-бер нәмә эләкмәгәнме икән, тип, тоҙаҡтарын ҡарарға бара. Ҡараһа, бер тоҙағына ҡуян эләккән, ти* (Әкиәттән).

2. *күсм.* Алдап ҡулға эләктереү өсөн эшләнгән хәйлә. *Тоҙаҡ ҡороу. Тоҙаҡҡа эләгеү.*

**ТОЗАН** *и.* Ҡыяҡлылар ғаиләһенән булып, татырлы ерҙә үҫә торған аҡтамырға ҡарҙаш сүп үләне.

**ТОЗЛАНДЫРЫУ** *к.* Ҡыҙығып, һоҡланып яндырыу (күҙҙе). *Күҙҙе тоҙландырыу.*

**ТОЗЛАНЫУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **тоҙлау** 1, 2. *Тоҙланған ҡыяр.*

**2.** Тоҙлоға әйләнеү, тоҙло булыу. *Тирҙә ҡатып, тоҙланып бөткән кейем.* ■ *Диңгеҙ бит тоҙланған был тоҙло күҙ йәштән.* Р. Ғарипов.

**3.** *күсм.* Ҡыҙығып, һоҡланып, яныу (күҙгә ҡарата). *Күҙе тоҙланып киткән.*

**ТОЗЛАУ** *к.* **1.** Тоҙло итеү, тоҙ ҡушыу. *Ашты тоҙлау. Тоҙлап ашау.*

**2.** Боҙолмаһын өсөн тоҙ һибеү йәки тоҙ ҡушыу. *Балыҡ тоҙлау. Ит тоҙлау. Ҡорот тоҙлау. Май тоҙлау. Йәшелсә тоҙлау. Кәбеҫтә тоҙлау. Ҡыяр тоҙлау.*

**3.** *күсм. һөйл.* Ваҡыт үтеү менән иҫтән сығарыу; онотоу. *Белемде тоҙлау.*

**ТОЗЛО** *с.* **1.** Тоҙ ҡатнаш. *Тоҙло күл. Тоҙло һыу.* / Тоҙо саманан артыҡ, тоҙо әсе. *Тоҙло аш.*

**2.** Тоҙ һибеп йәки тоҙ ҡушып ҡуйыулы. *Тоҙло балыҡ. Тоҙло ит. Тоҙло май. Тоҙло кәбеҫтә. Тоҙло ҡыяр.*

**3.** *күсм.* Сәнскеле, әсе (һүҙгә ҡарата). *Йәшерәктәре [егеттәрҙең] .. үткән-сүткән ҡатын-ҡыҙға үткер, тоҙло һүҙҙәр әйтеп ҡала.* А. Таһиров.

**ТОЗЛОҠ** *и.* **1.** Ит манып ашау өсөн әҙерләнгән тоҙло һимеҙ һурпа. *Иткә тоҙлоҡ ҡойоу. Тоҙлоҡҡа манып ашау.*

**2.** *диал.* Һөҙлөк.

**ТОЗЛОҠЛАУ** *к.* Тоҙлоҡҡа маныу. *Фәйзрахман ағай итте өлөшләп ултыртты.. Итте тоҙлоҡлап һоғондороштолар.* Н. Мусин.

**ТОЗҺАУ** *к. диал.* Тоҙһорау. *Тоҙһаған мал.*

**ТОЗҺОЗ** *с.* **1.** Тоҙ ҡушылмаған, тоҙо юҡ. *Тоҙһоҙ аш.* ■ *Күгәргән тары ярмаһынан тоҙһоҙ һыуҙа бешкән өйрә лә аслыҡҡа ныҡ борлоҡҡан тәнде ныҡыта алмай.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Мәғәнәһеҙ, аҡылһыҙ. *Тоҙһоҙ һүҙ.* ■ *Һәр кемгә ниндәйҙер мәғәнәһеҙ, тоҙһоҙ яуабын табып, һәр койка янында тигәндәй .. туҡталып, ул [Яшинский] Сәхибә туташ янына үтте.* З. Биишева.

● *Тоҙһоҙҙо күҙһеҙ ҙә белә.* Мәҡәл.

**ТОЗҺОЗЛАНЫУ** *к.* **1.** Тоҙһоҙға әйләнеү, тоҙһоҙ булыу. *Тоҙһоҙланған һыу.*

**2.** *күсм.* Мәғәнәһеҙ, аҡылһыҙ ҡыланыу.

**ТОЗҺОРАУ** *к.* Тоҙ теләү. *Тоҙһораған мал.*

**ТОЗҺОУ** *к.* Ныҡ ҡырҡыуланыу (әсеткән балға ҡарата). *Тоҙһоған бал.*

**ТО́ЖДЕСТВО** [*рус.*] *и. кит.* **1.** Тулы оҡшашлыҡ.

**2.** *мат.* Ниндәй һан ҡуйһаң да боҙолмай торған тигеҙлек.

**ТОЖДЕСТВОЛЫ** *с. кит.* Тулыһынса оҡшаш. *Тождестволы күренеш.* / Тап килешле. *Заманға тождестволы фекер.*

**ТОЗОРОЛОУ** *к. төш. ҡар.* **тозороу** 1.

**ТОЗОРОУ** *к.* **1.** Төйөп-төйөп һуғыу, төйөп туҡмау. *Йоҙроҡ менән тозороу.*

**2.** *күсм. һөйл.* Күп итеп ашау; төйөү. *Икмәк тозороу.*

**ТОЗРАЙЫУ** *к.* Асыуланып, төҫтө боҙоу. *«Уның кеүек илаҡтарҙы минең күргем дә килмәй»,— тип, Шәғәле тозрайҙы.* Ш. Янбаев.

**ТОЙҒО** *и.* Кешенең бөтә булған психик һәм физик кисереше; хис. *Ауыр тойғо. Ғәрләнеү тойғоһо. Ерәнеү тойғоһо. Йәшлек тойғоһо. Күңелле тойғо. Ҡурҡыу тойғоһо. Ҡыҙыҡһыныу тойғоһо. Татлы тойғо. Тойғоға батыу. Тойғоға бирелеү. Шатлыҡ тойғоһо. Юҡһыныу тойғоһо.* ■ *Уралдың текә ҡаялары, башы күккә тейгән тауҙары, мең йәшәр урмандары аша үткәндә әйтеп кенә аңлатып булмай торған ҙур тойғо уяна.* К. Мәргән. / Кешенең эске донъяһы, психик хәленән килгән мөнәсәбәт. *Теләктәшлек тойғоһо. Яратыу тойғоһо.* ■ *Иптәштәрҙең күңеленән беҙҙе ҡыҙғаныу тойғоһо күренеп тора ине.* Д. Юлтый.

**ТОЙҒОЛО** *с.* **1.** Тойғоға бай, тойғоға бирелеүсән. *Тойғоло кеше.*

**2.** Тойғо менән һуғарылған. *Тойғоло тауыш. Тойғоло хат.*

**ТОЙҒОН**[1] *и.* Ылаҫындар ғаиләһенә ҡараған аҡ сыбар төҫтәге эре йыртҡыс ҡош. *Тойғон өйрәтеү. Тойғон менән һунар итеү.*

**ТОЙҒОН**[2] *с. иҫк.* Нескә тойғоло, һиҙгер. *Тойғон кеше.*

**ТОЙҒОҺОЗ** *с.* Тойғоға ярлы, тойғоға бирелмәй торған. *Тойғоһоҙ кеше.*

**ТОЙОҠ**[1] *и.* Йылғаның яй ғына ағып, төбө тәрән батҡаҡ булып кисеү бирмәй ятҡан ере. *Тойоҡҡа төшөү.*

**ТОЙОҠ**[2] *и. иҫк. лингв.* Килеш. *Төп тойоҡ. Урын-ваҡыт тойоҡ.*

**ТОЙОҠЛАНЫУ** *к.* Тойоҡҡа әйләнеү, тойоҡ[1] булыу. *Тойоҡланып ятҡан ер.*

**ТОЙОҠЛАУ** *к.* **1.** Тойоҡ[1] итеү, тойоҡҡа әйләндереү. *Йылғаны тойоҡлау.*

**2.** Тоҡон[1] (1 мәғ.) ергә барып төртөлөү.

**ТОЙОЛОУ** *к.* **1.** Һиҙеү ағзаһына беленеү; һиҙелеү. *Булмәлә еҫ тойолмай.*

**2.** Аң, күңелгә нисек йәки ниндәйҙер булып күренеү; һиҙелеү. *Ауыр тойолоу. Ғәжәп тойолоу. Ҡыҙыҡ тойолоу. Ҡыйын тойолоу. Оҙаҡ булып тойолоу. Тар һымаҡ тойолоу. Ят тойолоу.* ■ *Бер көтөү йылҡыһы булған Ҡормош байға тайҙың ат булғаны тойолмай ҙа ҡала бит ул.* З. Биишева. *Һыу машинаның ишегенән инер төҫлө тойолдо. Ләкин шофер Ишбаев: «Ҡурҡма, тәрән түгел»,— тип тынысландырҙы.* Р. Ниғмәти.

**ТОЙОМЛАУ** *к. ҡар.* **һиҙемләү.**

**ТОЙОУ** *к.* **1.** Һиҙеү ағзаһы менән ҡабул итеп белеү. *Еҫте тойоу. Тәмде тойоу.* ■ *Ул [Фәйзуллин] арҡама ҡулын һалған һайын теге киҫелгән бармағы тәнемдең ҡайһы еренә тура килгәнен тойорға тырышам.* С. Агиш.

**2.** Аң, күңел менән ҡабул итеп белеү. *Ала бейә ҡайтыу яғына ыңғайлағанды тойоп, .. юртып китте.* Б. Бикбай. *Ҡыш. Әсе буран олой, үҙ үлемен тойған эт кеүек.* Х. Ғиләжев.

**3.** Бер төрлө тойғо кисереү, бер төрлө хис итеү. *Арығанды тойоу. Еңеллек тойоу. Рәхәтлек тойоу. Яҡынлыҡ тойоу. Яуаплыҡ тойоу.* ■ *Бала һөйөү хисе янды унда, тәрән бушлыҡ тойҙо бөгөн ул.* Ғ. Сәләм.

**ТОЙПО** *с. диал.* Өндәшмәҫ, шым. *Тойпо кеше.*

**ТОК** [*рус.*] *и.* Есемдәрҙә һәм вакуумда электр зарядтарының тәртипкә килтерелгән ағымы. *Ток көсө. Юғары йышлыҡтағы токтар. Ток алыу. Ток биреү.* **Үҙгәрешле ток** йүнәлеше һәм көсө үҙгәреп торған электр тоғы. **Үҙгәрешһеҙ ток** йүнәлеше һәм көсө үҙгәрмәгән электр тоғы.

**ТОКАРЛЫҠ** *и.* Токарь эше, һөнәре. *Токарлыҡҡа өйрәнеү.*

**ТОКАРЬ** [*рус.*] *и.* Төрлө нәмәне (күберәк металды) ҡырып эшкәртә торған эшсе. *Токарь мастерскойы. Токарь станогы. Токарь эше.*

**ТОКСИК** *с. биол., мед.* Ағыулай торған, зәһәрле. *Токсик матдә.*

**ТОКСИН** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. биол., мед.* Йән эйәләре һәм үҫемлектәр барлыҡҡа килтергән ағыулы матдә.

**ТОҠ** *и.* **1.** Сәселә торған ваҡ нәмәләрҙе һ. б. һалып һаҡлау һәм бер урындан икенсе урынға ташыу өсөн тупаҫ туҡыманан йәки ҡағыҙҙан бер башы ғына асыҡ ҡалдырып тегелгән оло ҡап. *Кесерткән тоҡ. Киндер тоҡ. Ҡағыҙ тоҡ. Тоҡ ауыҙы. Тоҡ тегеү. Тоҡ йөкмәү.* ■ *Елкәләренә тоҡ аҫҡан ике юлсы ҡайҙалыр ашығып-ашығып атлай.* Д. Юлтый. *Өс тоҡ та тулғас, Оморҙаҡ уларҙы бәйләп, арбаға күтәреп һалған* (Әкиәттән).

**2.** Сәселә торған ваҡ нәмәләрҙе шул ҡап менән үлсәү берәмеге. *Бер тоҡ он. Ике тоҡ бәрәңге. Ярты тоҡ бойҙай.*

◆ **Йоҡо тоғо** 1) ҡырҙа йоҡлау өсөн тоҡ-һымаҡ итеп эшләнгән йылы түшәк; 2) *шул уҡ* **йоҡо сүлмәге** (*кар.* **йоҡо** [1]). **Тот тоғоңдо** бирмәҫ теймәҫте йәки бик әҙ тейеүҙе белдереп әйтелә. *[Хаматнур:] Мин ни, хеҙмәт көнөнә ярты килонан иҫәпләп, кәмендә алты тоҡ алырға самалап, складҡа йүнәлдем.. Барһам — тот тоғоңдо! Тоҡ ярым да теймәне.* Д. Исламов.

**ТОҠАН** *и.* **1.** Еп, бауҙың әйләндереп килтереп эләктергән дүңгәләкле осо; элмәк. *Тоҡан яһау. Тоҡандан эләктереү.* / Төймәне элә торған элмәк; элгәс.

**2.** *диал.* Боғал.

**ТОҠАНДЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **тоҡандырыу.** *Тоҡандырылған ут.*

**ТОҠАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Ут төртөп, ут сағып яндырыу. *Газды тоҡандырыу. Тәмәкене тоҡандырыу. Ут тоҡандырыу. Шырпыны тоҡандырыу. Шәмде тоҡандырыу.* ■ *Бибеш боҫрап, бышылдап ятҡан сей уҫаҡ яркаларын тоҡандыра алмай, усаҡҡа өрөп маташа.* З. Биишева.

**2.** Хәрәкәткә килтереү (моторҙы); эшләтеү. *Моторҙы тоҡандырыу.* ■ *Иген елгәргестең моторы һүнгән. Ҡыҙҙар уны тоҡандыра алмай интегә ине.* Ә. Гәрәев.

**3.** *күсм.* Берәй тойғо һ. б. тыуҙырыу; уятыу. *Дәрт тоҡандырыу.* ■ *Тимәк, бер өмөт һүнгән, икенсе өмөттө тоҡандырып ебәрергә кәрәк.* Б. Бикбай.

**ТОҠАНЛАУ** *к.* **1.** Тоҡан (1 мәғ.) яһау, тоҡанлы итеү. *Арҡанды тоҡанлау. Тоҡанлап бәйләү.* ■ *Яра-а-ар,— тине олатай.— Мин һалабаш алып инеп, тоҡанлап булә торайым, ә һеҙ дәресегеҙҙе ҡарағыҙ.* Й. Солтанов.

**2.** Тоҡан һалыу. *Тоҡанлап элеү.*

**ТОҠАНЫУ** *к.* **1.** Ут тейеп, ут сағылып яныу. *Утын тоҡана.* ■ *Фәхри .. бер сыйыуҙа тоҡанмаған шырпыны һүгеп алды.* Б. Бикбай. *Ут инде һүнә төшкәндә генә ҡабаттан .. тоҡанып китте.* Я. Хамматов. *[Мәҙинә:] Үкенһәк тә һүнгән усаҡ тоҡанмаҫ ҡабат.* М. Кәрим.

**2.** *күсм.* Утлы һымаҡ балҡлау; яныу. *Зөлхизәнең әле генә моңайып мөлдөрәгән күҙҙәре инде Зөһрә йондоҙҙай тоҡанып китте.* З. Биишева.

**3.** *күсм.* Хасил булып, дәррәү көсәйә башлау; ҡеүәт алыу. *Һуғыш тоҡана. Ярыш тоҡана.*

**4.** *күсм.* Тойғо көсөнән ярһыу; яныу. *Теләк тоҡана. Хыял менән тоҡаныу.* ■ *Кешеләр ысын хеҙмәт дәрте менән тоҡанып, гөр килеп эшләне.* Б. Бикбай. *Тоҡанып киткән дәрт беҙҙе байтаҡ оҙатып барҙы* Й. Солтанов.

**5.** *күсм.* Асыуланып, ҡапыл ярһыу; ҡыҙыу. «*Юҡ, юҡ!— тип тоҡанып китте Мазһар.— Можаһар беҙгә һис кенә лә зарар итмәй!* Ш. Насыров.

**ТОҠЛАП** *р.* Тоҡҡа һалып, тоғо-тоғо менән. *Тоҡлап алғандар үҙҙәре икмәген дә ярмаһын.* Ғ. Дәүләтов.

**ТОҠОЙОУ** *к.* Бер йүнәлешкә табан бик шәп итеп китеү; елдереү. *Тоҡойоп сығып китеү.*

**ТОҠОЛ** *и.* Ҡойроҡ һөйәге.

**ТОҠОМ** *и.* **1.** Бер тамырҙан, бер ата-бабанан сыҡҡан быуындар теҙеме һәм шул теҙемгә ингән вәкил. *[Гөлзифа:] Беҙҙең тоҡом бик үрсемле ул. Өләсәйем ун өс бала тапҡан.* Б. Бикбай. *Мин халыҡтың .. һәр батырҙы үҙ тоҡомо, һис юғында үҙ яҡташы итеп иҫәпләү ғәҙәтен беләм.* З. Биишева. / Дөйөм сығыш менән бәйле халыҡ төркөмө; ырыу. *Тоҡом аҡһаҡалы.* / Уртаҡ сифат менән бәйле төркөм. *[Хафиз:] Беҙҙе, Салауат батыр тоҡомо, тиҙәр.* М. Тажи.

**2.** Бер сығанаҡтан килгән йәнлек, ҡош-ҡортҡа һ. б. ҡарата. *Малдың тоҡомо. Һыйырҙың тоҡомо. Тоҡомдо яҡшыртыу. Яҡшы тоҡом.* ■ *Һауырға тип алына торған бейә ҡаҙаҡ, башҡорт йәки ҡалмаҡ тоҡомонан булһын.* М. Ғөбәйҙуллин. / Яҡшы сифатҡа эйә булған мал заты; нәҫел. *Тоҡом айғыры. Тоҡом үгеҙе.*

**3.** Ниндәйҙер даими сифатҡа эйә булып, ер ҡабығының составына ингән минерал. *Вулкан тоҡомо. Тау тоҡомо.* ■ *Ай тоҡомдарында Ерҙә һирәк осрай торған хром, титан һәм цирконий кеүек элементтар .. булыуы асыҡланды.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 26 сентябрь.

**ТОҠОМДАШ** *и.* Бер тоҡомдан булған кеше (икенсе кешегә ҡарата). *[Салауат:] Бәлки, замандар үткәс, беҙҙең тоҡомдаштар бында килеп, ошо ерҙе изге итеп, зыярат ҡылар. Беҙҙең кандар сақырыр уларҙы.* М. Кәрим.

**ТОҠОМЛО** *с.* Яҡшы тоҡомдан булған, тоҡомо яҡшы булған. *Тоҡомло мал. Тоҡомло үгеҙ.*

**ТОҠОМСОЛОҠ.** *и.* Яҡшы тоҡом малы алыу һәм үрсетеү эше. *Тоҡомсолоҡ совхозы.*

**ТОҠОМҺОҘ** *с.* Тоҡомо яҡшы булмаған, тоҡомо насар. *Тоҡомһоҙ тәкә. Тоҡомһоҙ үгеҙ.*

**ТОҠОН** [1] *с.* **1.** Осо ҡапыл киҫелгән, ҡапыл килеп төкәлгән (юлға һ. б. ҡарата). *Тоҡон урам.* ■ *Шәп аҡҡан йылғаның башы тоҡон була.*

**2.** Тейешенсә тамамланмай, ҡапыл өҙөлгән (һүҙ һ. б. ҡарата). *Тоҡон фекер. Тоҡон һүҙ.* // *Ҡарт тик бер аҙҙан ғына бик тоҡон бөткән һүҙҙе ослап ҡуйыр өсөн ахыры: «Өфөлә элек бергә хеҙмәт иткән иптәш йәшәй. Шуның янына китеп барам»,— тигән булды.* Р. Солтангәрәев.

**3.** *ҡусм.* Тейешле күләм, дәрәжәнән кәм; етешһеҙ, тоҡос. *Ашау яғы тоҡон.*

**4.** *ҡусм. диал.* Мәғәнәһеҙ, тиҫкәре. *Тоҡон кеше.*

**5.** *ҡусм. диал. ҡар.* **төпкөл** 2.

◆ **Тоҡон шешек** *ҡар.* **шешек. Тоҡон эсәк** *диал.* һуҡыр эсәк (*ҡар.* **эсәк**).

**ТОҠОН** [2] *и.* Ҡыуығын ағасын тота торған кәртә.

**ТОҠОН** [3] *и. диал. ҡар.* **ҡотан** [2].

**ТОҠОР** *с.* **1.** Үҙе йыуан, үҙе ҡыҫҡа. *Тоҡор бармаҡ.*

**2.** *диал. ҡар.* **төпөш** [1].

**ТОҠОС** *с.* **1.** Тейешенсә дауам итмәй, кәрәгенсә осланмай бөткән; тоҡор. *Тоҡос ҡойроҡ. Тоҡос танау. Тоҡос шиғыр.*

**2.** *ҡусм.* Тейешле күләм, дәрәжәнән кәм; етешһеҙ, тоҡон. *Ҡеҫә яғы тоҡос.*

**ТОҠОСАЙТЫУ** *ҡ.* **1.** Тоҡосҡа (1 мәғ.) әйләндереү, тоҡос итеү.

**2.** *ҡусм.* Етешһеҙгә, әҙгә әйләндереү; әҙәйтеү.

**ТОҠОСАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Тоҡосҡа (1 мәғ.) әйләнеү, тоҡос булыу. *Тоҡосайып ҡалған ҡойроҡ.* ■ *— Тоҡосайып, үргә шаңҡайған танауың менән эскә батҡан күҙеңде типһәнгән әйләндерер.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *ҡусм.* Етешһеҙ, әҙгә әйләнеү; әҙ булыу; әҙәйеү.— *Балам, аҙығың тоҡосайғандыр инде. Шулай булһа ла һыу-һул ваҡытында ҡайтып йөрөмә.* Н. Мусин.

**ТОҠСА** *и. ҡар.* **тоҡсай.**

**ТОҠСАЙ** *и.* **1.** Бәләкәй генә тоҡ. *Тоҡсай йөкмәү. Тоҡсай тегеү. Юл тоҡсайы.* ■ *Малай бара. Ҡайҙа бара, тоҡсай аҫып арҡаһына.* М. Кәрим.

**2.** Ата енес биҙе урынлашҡан тире мусҡул, ҡап. *Тәкә тоҡсайы. Үгеҙ тоҡсайы.* / *бот.* Үҫемлектең орлоҡ, һеркә урынлашҡан ҡабы. *Бәбәк тоҡсайы. Һеркә тоҡсайы.*

**3.** *ҡусм.* Кешенең ниндәйҙер бер сифат, ғәҙәте көслө булғанды белдерә. *Алдыҡ тоҡсайы. Ғәйбәт тоҡсайы. Йоҡо тоҡсайы.*

**ТОҠСАЙЛАНЫУ** *ҡ.* Тоҡсай (1 мәғ.) рәүешендә булыу. *[Әбейҙең] күҙ ҡабаҡтары тоҡсайланып һалынып төшкән.* И. Ниғмәтуллин.

**ТОҠСО** *и.* Ҡытлыҡ ваҡытында тоҡ күтәреп йөрөгән алыпһатар. *Бер мөйөштә унлаған тоҡсо йыйылған. Улар бер-берен алдамаҡсы, ҡайҙа барғанын әйтмәй, башҡаларҙан эҙ яҙҙырмаҡсы була.* А. Таһиров.

**ТОҠТОМАЛҒА** *р. ҡар.* **тиктомалға.** *Маһира тоҡтомалға Әмирҙең сикәһенә сабып ебәрер .. төҫлө ине.* Х. Ғиләжев. *[Ҡатын:] Атаҡ-атаҡ! Енең тоттомо әллә? Ниңә тоҡтомалға мине төрткөләйһең?* Б. Ишемғол.

**ТОҠТОМАЛДАН** *р. ҡар.* **тиктомалдан.**

**ТОЛ** [1] *с.* Ире йәки ҡатыны үлеп, яңғыҙ ҡалған. *Тол булыу. Тол ир.* ■ *Тол ҡатын алһаң, мутлығы үҙенән ауыр булыр.* З. Биишева. *Әбей үлде, бабай тол ҡалды, ти* (Әкиәттән).

**ТОЛ** [2]: **тол ат** ауға, бәйгегә яратылған ат; ярау ат. **Тол бесән** *диал.* аҙау бесән (*ҡар.* **бесән**).

**ТОЛ** [3] [*рус.*] *и.* Шартлатҡыс матдә. *Тол шашкаһы. Тол һалыу.*

**ТОЛАР** *и. иҫк.* Боронғо тирмә. *Толарҙан бейек әй таш төрмә, алты паҡуй уның өйҙәре* (Халыҡ йырынан).

**ТОЛАҪ** *с. диал.* **1.** Әрпеш. *Толаҫ кеше.*

**2.** Болалы. *Толаҫ ваҡыт.*

**ТОЛҒА** *и. ҡар.* **өстаған** 2. *Толғаға сүлмәк ултыртыу.*

**ТОЛҒАҠ** *и. ҡар.* **тулғаҡ.**

**ТОЛҠА** *и.* Күңелгә ҡәнәғәтлек, рәхәтлек бирер нәмә; ҡот, йәм. *Күңелһеҙ. Ҡайҙа барырға ла белмәйем. Паркка киттек, унда ла толҡа тапмай, кире ятаҡҡа ҡайттым.* Р. Солтангәрәев. *Ҡарсығанан ҡасҡан һуна өйрәк толҡа тапмаҫ екән ҡамышһыҙ* (Халыҡ йырынан).

**ТОЛҠАЛЫ** *с.* Күңелгә ҡәнәғәтлек, рәхәтлек бирер сифатлы; ҡотло, йәмле. *Толҡалы өй.*

**ТОЛҠАТ** *и.* Ҡарындағы яралғы. *Толҡат ике айҙан балаға әйләнә.*

**ТАЛҠАҺЫҘ** *с.* Күңелгә ҡәнәғәтлек, рәхәтлек бирмәгән; ҡотһоҙ, йәмһеҙ. *Толҡаһыҙ өй. Толҡаһыҙ тормош.* ■ *Булмә йорттоң икенсе ҡатында. Берҙән-бер тәҙрәнән, ишектән ел үтеп тора. Һалҡын, толҡаһыҙ.* С. Кулибай.

**ТОЛҠАҺЫҘЛАНЫУ** *ҡ.* Толҡаһыҙға әйләнеү, толҡаһыҙ булыу. *Өй толҡаһыҙланды.*

**ТОЛЛАНДЫРЫУ** *ҡ. диал.* Аҙапландырыу, мәшәҡәтләндереү.

**ТОЛЛАНЫУ** *ҡ. диал.* Аҙапланыу, мәшәҡәтләнеү. *Бынау эште бөтөрә алмай толландым.*

**ТОЛОҒОУ** (толоҡ*ⱥ*) *ҡ. диал.* Тоташыу, ялғаныу.

**ТОЛОМ** *и.* **1.** Үргән оҙон сәс. *Оҙон толом. Ике толом итеп үреү. Толомдо тағатыу.* ■ *Заятүләк шым ғына арттан килеп, [һыу ҡыҙының] таш өҫтөнә һүҙып һалған сәс толомонан ҡапыл тотоп ала.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** *ҡусм.* Берәй нәмәнән оҙон тар булып таралған һыҙат. *Төтөн толомо.* ■ *Таштар ҡултығында паровоздың аҡ толомо ҡалды ишелеп.* Ғ. Сәләм.

**ТОЛОМЛАУ** *ҡ.* Толом (1 мәғ.) итеү. *Толомлап үреү.*

**ТОЛОМЛО** *с.* Толомлап үреүле. *Толомло сәс.*

**ТОЛОП** [1] *и.* **1.** Бөтөн көйө тунап алған йәнлек тиреһе. *Толоплай тунау.*

**2.** Тиреһен бөтөн көйө тунап, һалам тултырып яһалған йәш мал. *Һыйырҙы толопҡа әүрәтеп һауыу.* / Тотошлай һуйылған тире эсенә сүбәк, һалам тултырып яһаған ялған ҡош, йәнлек.

◆ **Толоп булып шешеү** *ҡар.* **шешеү.**

**ТОЛОП** [2] *и.* Бейек шәл яғалы, киң, оҙон итеп тиренән теккән ҡышҡы кейем. *Бүре толоп. Төлкө толоп. Толоп кейеү.* ■ *Толопҡа уранып, елгә арҡа ҡуйып, йөк өҫтөнә ултырып алған ылаусыларҙың йөҙөн күреп булмай.* Б. Бикбай.

**ТОЛОПЛАУ** *ҡ.* **1.** Тотош көйө тунау (мал, йәнлектең тиреһен). *Толоплап алыу.*

**2.** Толоп [1] (2 мәғ.) менән әйҙәреү. *Толоплап һауыу.*

**ТОЛПАР** *и.* **1.** Әкиәттәге ҡанатлы ат. *Толпар заты.* ■ *Батша ҡыҙының буҙ толпары Буҙансы батыр алдына осоп килеп тә еткән* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Бик яҡшы етеҙ ат; арғымаҡ. *Зөлҡәрнәй .. бурыл толпары менән елә-саба килеп тә еткән.* Н. Иҙелбай. *Толпар менеп, ҡорал тотоп, яуға ҡаршы барамын* (Халыҡ йырынан).

● *Арғымаҡты яманлап, толпарҙы ҡайҙан табырһың.* Мәҡәл.

**ТОЛУО́Л** [*рус.*] *и.* Хуш еҫле шыйыҡ углеводород (шартлатҡыс матдә, бурыҡ, дарыу эшләүҙә ҡулланыла).

**ТОЛЧО́К** [*рус.*] *и.* Ваҡ-төйәк, иҫке-моҫҡо һата торған баҙар. *Толчокка сығыу. Толчокта йөрөү. Толчоктан алыу.*

**ТОЛЧОКСЫ** *и.* Толчокка йөрөп кәсеп итеүсе.

**ТОЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ҡатырғаны махсус составҡа манып эшләгән ябыу материалы (төҙөлештә изоляциялау материалы итеп тә ҡулланыла). *Толь менән ябылған ҡыйыҡ.*

**ТОМ**[1] *и. иҫк.* Дауа. *Берҙән-бер көндө хан бик ҡаты ауырып китә. Төрлө яҡтан имсе саҡырталар. Имселәр килә, ҡот ҡоя, ҡарай, бер ҙә том таба алмай* (Әкиәттән).

**ТОМ**[2] [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Әҫәр йәки баҫмаӊың айырым китаптан торған өлөшө. *Дүрт томдан торған роман. Беренсе том. Бишенсе том.*

**ТОМА** *киҫ.* Ҡайһы бер сифат һәм исем менән килеп, артыҡлыҡ дәрәжәһе бирә; шыпа, дөм. *Тома наҙан. Тома һуҡыр. Тома ҡараӊғы. Тома сит яҡ.* ■ *Тома батраҡ бит инде Тимеркәй, ә үҙе Ғәлкәй балалары һүҙен һөйләй.* Б. Ишемғол.

**ТОМАЙ** *с. диал.* Сонай, мөтөр. *Томай ҡолаҡ. Томай һыйыр.*

**ТОМАҠ** *и.* Ҡаҙаҡ бүрке. *Ебәк менән тышлап томаҡ тегәләр* Ғ. Ғүмәр.

**ТОМАЛ** *р.* Бер ҙә юҡҡа, бушҡа. [*Таӊдыса:*] *Әллә ниҙәр юраным. Айыу һуҡты, урланды, тип тә томал уйландым.* «Ҡуӊыр боға».

**ТОМАЛАНДЫРЫУ** *ҡ. ҡар.* **томалау** 1. *Күҙ алдын томаландырыу.*

**ТОМАЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **томалау.** *Томаланған мейес.*

**2.** *ҡайт. ҡар.* **томалау** 2. *Томаланып ултырыу.*

**3.** Болот, томан кеүек нәмә менән ҡапланып, асыҡ күренмәҫ, беленмәҫ хәлгә килеү. *Йондоҙҙар ҙа, хатта йондоҙҙар ҙа томалана төнгө томанда.* М. Кәрим. / Берәй төрлө тойғо тәьҫирендә асыҡ беленмәү йәки йәш менән ҡапланыу. *Йәш менән күҙ томалана.* ■ *Күҙ алдым томаланып китте. Бер аҙҙан һуӊ ғына айнып, уны [Һибәт ағайҙы] ҡосаҡлап алдым да илай башланым.* Д. Юлтый.

**4.** *күсм.* Асыҡ, аныҡ эш итеү һәләтен юғалтыу. *Баш томалана. Мейе томалана. Хәтер томалана.* ■ *Петр Тимофеевичтың зиһене томаланды. Ул башҡа бер ни ишетмәне, күрмәне.* Я. Хамматов.

**ТОМАЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **томалау.** *Мунсаны томалатыу.*

**ТОМАЛАУ** *ҡ.* **1.** Тотош баҫып алып ҡаплау (болот, томан кеүек нәмәгә ҡарата). *Ҡояш яӊынан юғалды. Күкте йәнә ҡара болот томаланы, ямғыр ҡойорға тотондо.* Р. Низамов. / Томан менән ҡаплаған һымаҡ, томанлы һымаҡ итеү (күҙҙе). *Күҙ алдын томалау.* ■ *Томалағас ҡайнар ҡаны егеттеӊ күҙен, ҡылысын күтәргән көйө оноткан үҙен.* Ғ. Дәүләтов.

**2.** Тишек-тошоҡ ҡалдырмай ҡаплау. *Ишек, тәҙрәне томалау. Бүлмәне томалау. Мөрйәне томалау.* ■ *Етмеш кубометр самаһы утын күмергә әйләнгәнсә, мейес .. томалап ҡуйыла.* М. Тажи. *Гөлбикә мунсаны һәйбәтләп тороп яҡҡан. Мунса булғас, ҡыҙыуы һүрелмәҫ борон томалап ҡуйған* (Әкиәттән).

**3.** *күсм.* Асыҡ, аныҡ эш итә алмаҫлыҡ, асыҡ беленмәҫлек итеү. *Аӊды томалау. Зиһенде томалау. Тойғоно томалау.* ■ *Хаммат .. аҡтарҙың һиҙгерлеген томалау, .. ҡорал эләктереү хаҡында уйланы.* З. Биишева. *Көн күреүҙе үҙенә еӊел итер өсөн хәҡиҡәтте томалаған* (Мөнәжәттән).

**ТОМАН** *и.* **1.** Атмосфераның түбәнге ҡатламында болот һымаҡ булып барлыҡҡа килгән быу. *Аҡ томан. Күк томан. Ҡара томан. Томан асыла. Томан күтәрелә. Томан төшә.* ■ *Тын күлдәргә төшкән аҡкошмо ни, уйһыуҙарҙа ята аҡ томан.* Ғ. Сәләм. *Иртәнсәк тә томан, кис тә томан, был томанҡайҙарға ни булған?* (Халыҡ йырынан). / Саң, томан кеүек нәмәнең һауалағы үтә күренмәгән, тоноҡ ҡатламы. *Саң томаны.* ■ *Ҡар томаны эсенә елеп кереп юғалған пар аттың артында Асатайҙың толобо ғына бер аҙ ҡара тимгел булып барҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Асыҡ итеп күрһәтмәй, томалаған нәмә. *Күҙҙе томан баҫа. Күҙ алдын томан ала.* / Асыҡ белеп эш итеүгә, яҡшы аңлауға ҡамасаулаған нәмә. *Башты томан ала.* ■ *Бер аҙҙан беҙ ҡымыҙҙың еңелсә генә томаны эсендә инек.* Ә. Вахитов. / Йөҙ, сырайҙы шәүлә булып ҡаплаған ҡиәфәт. *Берәү ҙә сырай асып, .. көләс һын бирә алмай. Тик һөмһөрҙәрен ҡойолдороп, ҡабаҡтарын емереп, ниндәйҙер ҡайғы томанына инеп юғалғандар.* Т. Хәйбуллин.

◆ **Асылмаҫ ҡара томанға төшөү** бик тәрән ҡайғыға ҡалыу.

**ТОМАНА** *с.* Аң, белемһеҙ, тома наҙан. [*Әбей:*] *Үҙе кеүек ҙур уҡыған ҡыҙҙыр инде.. Беҙҙең кеүек томана кешене әҙәмгә һанамай, тырыҫ-мырыҫ итеп тормаһа ярай инде.* Ж. Кейекбаев. *Сәлмәнбер томана, ғүмер буйы уҡый-яҙырға ла белмәгән.* Б. Бикбай.

**ТОМАНЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Томанға әүерелеү, томан булыу. *Минең үткәндәрем төтөндәрҙәй томанланып, осоп юғалды.* Ғ. Амантай. / Томан рәүешендә булыу, томанлы булыу. *Томанланып күренеү.*

**2.** *ҡар.* **томаланыу** 3.

**ТОМАНЛАУ** *ҡ.* Томанлы булыу. *Көн томанлап тора.*

**ТОМАНЛЫ** *с.* **1.** Томан менән ҡапланған һымаҡ; тоноҡ. *Томанлы күҙ.*

**3.** *күсм.* Асыҡ, аныҡ түгел; аңлайышһыҙ, билдәһеҙ. *Томанлы ниәтәк. Томанлы мәсьәлә. Томанлы фекер.* ■ *«Әйе, томанлы хәл, сыуалсыҡ»,— тине Тимер.* Б. Бикбай.

**ТОМАНҺЫРАУ** *ҡ.* Бер аҙ томанлау; томанһыу. *Көн томанһырап тора.* ■ *Томанһырап, күгәреп, болоттарҙы ялмалап, Урал тора алдымда.* «Урал батыр».

**ТОМАНҺЫУ** [1] *к.* Бер аҙ томанлау; томанһырау. *Егет томанһып ятҡан Ирәндек һырттарына ҡарап туя алмай.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТОМАНҺЫУ** [2] *с.* Бер аҙ томанлы, әҙерәк томанлы. *Томанһыу кис.* ■ *Иртә менән торғанда көн томанһыу ине. Беҙ сәй эсеп сыҡҡанса томан күтәрелгән.* Д. Юлтый.

**ТОМАРЛАУ** *к. диал. кар.* **ботарлау** 1.

**ТОМА́Т** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* **1.** *махс.* Помидор. *Томат һуты.*

**2.** Помидорҙан эшләнгән паста. *Томат консерваһы. Томатлы балыҡ.*

**ТОМБАТ** *с.* Болотло, ҡараңғы, ел-ямғырһыҙ. *Томбат көндә күңелһеҙ.*

**ТОМБАТЛАУ** *к.* Томбатҡа әйләнеү, томбат булыу. *Көн томбатлап тора.*

**ТОМБОЙОҠ** *и.* Ләлә һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, һыу өҫтөндә йәйелеп ятҡан эре түнәрәк япраҡлы, аҡ йәки һары төҫтәге эре сәскәле һыу үҫемлеге. *Аҡ томбойоҡ. Һары томбойоҡ. Томбойоҡло күл.* ■ *Һыу сите ҡамышлыҡ, асығыраҡ урындарында томбойоҡ сәскәләре күренә.* И. Нигмәтуллин. **Һаҙ томбойоғо** киң эре ялтыр япраҡлы, һары төҫтәге ябай сәскәле һыу буйы үләне.

**ТОМҒОЛ** *с.* Ҡара төҫкә тартым; ҡараһыу. *[Ҡыҙҙың] томғол сәсе төшкән ал битенә, бит алмаһы көнгә алланған.* Ғ. Хәйри.

**ТОММА** *и.* Солоҡ умарта күтәреү өсөн япраҡлы ағас (әсе соҡорораҡ, үҙәге көпшәк була).

**ТОМОҘ** *с.* Ҡыҫҡа һәм йыуан. *Томоҙ кеше.* ■ *[Клава] томоҙ танауын йәмшәйтеп көлдө.* Һ. Дәүләтшина.

**ТОМОҠ** *с. диал. кар.* **тоҡос** 1. *Насар һыйырҙың ҡойроҡ осо томоҡ була.*

**ТОМОЛДОРОҠ** *и.* **1.** Кешнәп тауыш сығармаһын өсөн ат ауыҙына кейҙерә торған киндер морондоҡ.

**2.** Балыҡ мәскәүләгәндә күләгә яһау өсөн һыу өҫтөнә һалған япраҡ.

**ТОМОРҠО** *с. диал.* Томра [1]. *Томорҡо көн.*

**ТОМОРҠОЛАНЫУ** *к. диал.* Томраланыу.

**ТОМОРОЛОУ** *к. диал.* Ташланыу, йомолоу. *Алға томоролоу. Томоролоп сабыу.*

**ТОМОРОУ** *к. диал.* Ташлау, бәреү. *Таш томороу.*

**ТОМОРҺОУ** *с. диал.* Томра. *Томорһоу көн.*

**ТОМПОШ** *с. диал. кар.* **төпөш** [1].

**ТОМРА** [1] *с.* **1.** Елһеҙ, эҫе һауалы; бөркөү. *Көн томра. Ямғыр яуыр, ахыры.* Я. Хамматов. *Көн томра. Ҡояш һүрелә төшһә лә, тын алыуы ауыр.* Ә. Вахитов.

**2.** *и. мәғ.* Дымһыу, елһеҙ, эҫе һауа. *Көндөҙгө томра. Көн томраһы.*

**ТОМРА** [2] *с. диал. кар.* **томһа** 1.

**ТОМРАЙЫУ** *к. диал. кар.* **томһарыу** 1.

**ТОМРАЛАНЫУ** *к.* Томра [1] (1 мәғ.) хәлгә килеү; томра булыу. *Элек тә эҫе һауа сәғәт дүрттәргә ныҡ томраланды.* Х. Мохтар.

**ТОМРАУ** [1] *к.* **1.** Томра [1] (1 мәғ.) булыу, эҫелек бөркөү. *Томрап торған көн.* ■ *Мин эҙләгән яҡты йондоҙ томрап яна бигерәк йыраҡта.* Б. Мирзанов.

**2.** *күсм.* Йылы хис, тойғо бөркөү. *Томрап торған күҙ.* ■ *Күҙен минән алмай томрап ҡарап ҡалды, мин киттем.* М. Басыров.

**3.** *күсм.* Матурлыҡ, йәм бөркөү. *Томрап торған ҡыҙ.* ■ *Сәскәләр күҙ яуын алып, томрап ултыра.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТОМРАУ** [2] *к. диал. кар.* **томһарыу** 1.

**ТОМРОҠ** *с.* Тәрән, ҡараңғы, тымыҡ һыулы. ● *Томроҡ күлдә ҡорт була.* Мәҡәл.

**ТОМТОҠ** *с. диал. кар.* **төпөш** [1]. *Томтоҡ кеше.*

**ТОМҺА** *с.* **1.** Ҡараһыу, ҡараңғы төҫ. *Ағастарҙың томһа шәүләләре ҡаҙалғандай тора упҡынға.* Ә. Вәли.

**2.** *күсм.* Ҡараңғы, күңелһеҙ, йонсоу (көнгә ҡарата). *Былай ҙа томанлы, томһа көн төн менән алмашынып бара ине.* З. Биишева. / Кәйефһеҙ, ҡараңғы сырайлы. *Томһа кеше.* ■ *[Нәсриҙең] йөҙө, әүене янғандай, йомоҡ, томһа була торғайны.* Ғ. Лоҡманов.

**ТОМҺАЙЫУ** *к.* **1.** *кар.* **томһарыу 1.**

**2.** *күсм.* Кәйефһеҙләнеп, төҫ боҙоп, өндәшмәҫ булыу; йөҙ һытыу. *Атайым бик оҙаҡ эсе бошоп, томһайып йөрөнө.* З. Биишева.

**ТОМҺАЛАНЫУ** *к. кар.* **томһарыу** 1.

**ТОМҺАРТЫУ** *к.* **1.** Ҡараһыу, ҡараңғы төҫ биреү, томһа итеү. *Йөҙҙө томһартыу.*

**2.** *күсм.* Күңелһеҙ, төҫһеҙгә әйләндереү.

**ТОМҺАРЫ** *и.* Ҡанат осо менән маңлайы аҡ, бөтән ере ҡараһыу төҫтәге эре йомро өйрәк. *Томһарылар ваҡ ҡына сүре ҡамышлығына йөҙөп инеп китте.* Т. Килмөхәмәтов.

**ТОМҺАРЫУ** *к.* **1.** Ҡараһыу, ҡараңғы төҫ алыу; томһа булыу. *Ятыуҙа һыу томһарып ята.*

**2.** *күсм.* Күңелһеҙ, төҫһеҙгә әйләнеү. *Көн боҙолор һымаҡ булып томһарып китте.*

**ТОМШОҠ** *и.* **1.** Йәнлек, хайуандың оҙон мороно. *Һарыбай .. эҙ-фәлән күрһә, томшоғон ҡарға терәп, бер-ике сөскөрә лә, беҙҙе юл ситенә алып сығып китә.* Р. Ғабдрахманов. *Нәҙекәйбил [бал ҡорто] бер сәскәгә ҡунды. Оҙон томшоғон рәтләне лә сәскәнең һары һеркәле бәбәгенә төпкә батырҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *кәмһ.* Танау. *[Ғәйзулла:] Ниңә илайһың?.. Әллә малайҙар бештеме? Әйт, томшоғон онтайым.* Я. Хамматов. **Томшоҡ морон** ҙур танау.

♦ **Ҡыу томшоҡ** ырыҫ, өлөштән мәхрүм, бәхетһеҙ.

**ТОН** [1] [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *муз.* Билдәле бер юғарылыҡтағы музыкаль тауыш. *Түбән тон. Юғары тон.* ■ *[Гармунсы] йырсының тауышына тура килерлек тон һайлай алмай яфалана ине.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Һүҙ, телмәрҙең хис, мөнәсәбәтте сағылдырған әйтелеш рәүеше; тауыш. *Асыулы тон. Йомшаҡ тон. Ҡаты тон.* ■ *Сыртланов бик һалмаҡ тон менән аңлатма бирергә кереште.* С. Агиш.

**3.** Төҫтөң асыҡлыҡ дәрәжәһе. *Асыҡ тон. Тоноҡ тон.*

♦ **Тон биреү** тейешле йүнәлеш күрһәтеү.

**ТОН** [2] *с. диал.* Йыш, ҡуйы. *Тон ҡамыш.*

**ТОНДОРОУ** [1] *к.* Буръяҡланып торған нәмәләрен төпкә ултыртып, таҙартыу. *Һыуҙы тондороу.*

**ТОНДОРОУ** [2] *к.* Көпләнгән, тығылған кеүек итеү. *Ломовой һәм еңел извозчиктар урамға*

*тушәлгән йомро таштарҙы дөңгөрләтеп, колакты тондороп бөтә.* Б. Бикбай.

◆ **Күҙен тондороп (йәки тондора ла)** *кар.* **күҙ.**

**ТОНДОРОУ**[3] *к.* **1.** Нык итеп һуғыу; кундырыу. *Йоҙрок менән тондороу. Күсәк менән тондороу.* ■ *Икенсе Буре Турыкайҙың койрогона йәбешмәксе ине, Турыкай һиҙеп калып, арткы аяктары менән уның яңагына тондорҙо.* С. Агиш. / Нык итеп тейҙерә бәреү, тейҙерә атыу. *Таш менән тондороу.* ■ *Ук-һаҙагын шунда борам, төҙәп кенә бер тондорам* (Бәйеттән).

**2.** *кусм.* Һүҙ, һорау кеүекте туктауһыҙ күпләп кемдеңдер адресына йүнәлтеү; яуҙырыу.— *Карами менән танышһыңмы? — Һис көтмәгәндә йәнә килтереп һорау тондорҙо был [Сәфәрғәли] миңә.* В. Нафиков.

**ТОНЗИЛЛИТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. мед.* Йоткологок биҙҙәренең шешеүе.

**ТОНИК** *с.* Баҫым һанына короллан. *Тоник система. Тоник үлсәм. Тоник шиғыр.*

**ТОНЙОР** *с. диал. кар.* **тос**[1]. *Тонйор башак.*

**ТОНЙОРАТЫУ** *к.* Бойок, уйсан итеү. *Күҙҙе тонйоратып карау.*

**ТОНЙОРАУ** *к.* **1.** Бойок, уйсан булыу. *Тонйораған күҙ карашы. Тонйорап ултырыу.*

**2.** Ойоған кеүек, тыныс, тымык булыу. *Тонйорап ағыу.* ■ *Болонлоктар куйынында Акманай, Ишбай күлдәре тонйорап ята.* Ғ. Хөсәйенов.

**3.** Нуры, яктыһы кайтып, тоноклланыу; һүрәнләнеү. *Бейек тауҙың үлгәне — башын монар алғаны; ай менән көндөң үлгәне — тонйорап байып барғаны* (Кобайырҙан).

**ТОННА** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Мең килограмға тиң ауырлык үлсәү берәмеге. *Бер тонна нефть. Өс тонна йөк.*

**ТОННАЖ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** *диңг.* Бер йәки бер төркөм караптың йөк һыйҙырышы. *Сауҙа флотының тоннажы. Күп тоннажлы карап.*

**2.** Машинаның йөк һыйҙырышы. *Вагондың тоннажы. Самолёттың тоннажы.*

**ТОННАЛАП** *р.* Тоннаға һалып. *Тонналап үлсәү. Тонналап өләшеү.*

**ТОННЕЛЬ** *и. кар.* **туннель.**

**ТОНОҒАЙТЫУ** *к.* **1.** Томанһыу, тонок төҫ биреү; тоноклау. *Быяланы тоноғайтыу.* / Баҙык, асык төҫтән яҙҙырыу, тоноклау, төҫһөҙләү. *Биҙәкте тоноғайтыу.*

**2.** Яктылык кимәлен кәметеп, тоноклау; һүрәнкеләү. *Көндөҙгө кеүек саң күтәрелде, ай яктыһын тоноғайтты.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Яңғыраш кимәлен кәмәтеп, тонок итеү; тоноклау.

**4.** *кусм.* Һүрән, тәьҫирһеҙ итеү; тоноклау, төҫһөҙләнеү. *Йылдар хәтер һандығын тоноғайтты.*

**ТОНОҒАЙЫУ** *к.* **1.** Томанһыу, тонок төҫ алыу; тоноклланыу. *Тоноғайған быяла.* / Баҙык, асык төҫтө юғалтыу; тоноклланыу, төҫһөҙләнеү. *Тоноғайған биҙәк.*

**2.** Яктылык кимәлен кәметеү; тоноклланыу, һүрәнкеләнеү. *Тоноғайған яктылык.*

**3.** Яңғыраш кимәлен кәмәтеү; тоноклланыу. *Тауыш тоноғая.*

**4.** *кусм.* Һүрән, тәьҫирһеҙгә әйләнеү; тоноклланыу. *Иҫтәлектәр тоноғая.*

**ТОНОК**[1] *с.* **1.** Тонып таҙарған; буръяк түгел; таҙа. *Тонок һыу. Йылғаның тонок урыны.* ■ *Күл тонок, .. көҙгө кеүек булып ята ине.* М. Ғафури.

**2.** Асык күренмәҫ, ялтыр түгел; томанлы һымак. *Тонок быяла. Тонок көҙгө.* / Баҙык сағыу түгел; төҫһөҙ. *Тонок буяу. Тонок көмөш. Тонок төҫ.* ■ *Тышта .. ҙур тәҙрәне тонок биҙәктәргә буяп, таң ата.* М. Хәйҙәров.

**3.** Асык, баҙык түгел; һүрәнке, бөләңгерт. *Тонок ай. Тонок күҙ. Тонок нур. Тонок яктылык.* // *Тонок кына янеу. Тонок кына булып баҙлау.* ■ *Кала караңғы, бер нисә урында тонок кына электр фонарҙары күренә.* Д. Юлтый. *Шофёр .. мәғәнәһеҙ, тонок караш ташланы.* С. Агиш. *Көн болотло, ай тактаһы тонок кына төшә.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Асык, яңғырауыклы түгел; һаңғырау. *Тонок тауыш.* // *Тонок кына шылтырау.* ■ *Тонок кына ишетелгән тибенге тауыштары мине һиҫкәндерҙе.* Б. Ишемғол.

**5.** *кусм.* Һүрән, тәьҫирһеҙ күренешле; төҫһөҙ. *Романда социаль-тарихи вакиғалар тонок килеп сыккан.* М. Минһажетдинов. // *Хикәйәлә партячейка секретары Акйән тонок һүрәтләнгән.* «Ағиҙел», 1968, № 8.

**ТОНОК**[2] *и.* Ниҙер һалып тондорған шыйыклык. *Көл тоноғо. Кайын тоноғо.*

**ТОНОКЛАНДЫРЫУ** *к. кар.* **тоноклау.**

**ТОНОКЛАНЫУ** *к.* **1.** Томанһыу, тонок төҫ алыу. *Тоноклланған быяла. Тоноклланған көҙгө.* / Баҙык, асык төҫтө юғалтыу; төҫһөҙләнеү. *Камыштарҙан төшкән наҙлы шәүлә тоноклланды.* Х. Ғиләжев. *Кылыс йөҙөндә алтын менән буйҙан буйға гәрәпсә яҙылған бер ни тиклем тоноклланған яҙыу: «Уралда, Өфө губернаһының Корман-тау ауылында табылған»,* «Совет Башкортостаны», 1986, 3 июль.

**2.** Яктылык кимәлен кәмәтеү; һүрәнкеләнеү. *Ай нуры тоноклана.* ■ *Карт .. тоноклана башлаған күҙҙәрен сырт-сырт йомғолап, һөйләп китте.* Д. Исламов.

**3.** Яңғыраш кимәлен кәметеү. *Тауыш тоноклана.*

**4.** *кусм.* Һүрән, тәьҫирһеҙгә әйләнеү; төҫһөҙләнеү. *Хәтирәләр тоноклана.*

**ТОНОКЛАУ** *к.* **1.** Томанһыу, тонок төҫ биреү. *Быяланы тоноклау.* / Баҙык, асык төҫтән яҙҙырыу; төҫһөҙләү. *Биҙәкте тоноклау.*

**2.** Бөләңгерт төҫ биреү; һүрәнкеләү. *Таң яктыһы айҙы тоноклай.*

**3.** Яңғырауыкһыҙ, һүрән итеү. *Тоноклай таш-кын тауышын яр башындағы йырҙар.* Р. Бикбаев.

**4.** *кусм.* Һүрән, тәьҫирһеҙ итеү; төҫһөҙләү. *Оҙон йылдар иҫтәлектәрҙе тоноклай.*

**ТОНОУ**[1] *к.* Буръяклап торған нәмәләре төпкә ултырып, таҙарыу. *Һыу тона.* ■ *Көн эҫе ине. Кисә яуып үткән койма ямғырҙан һуң юлда ҙур-ҙур күләүектәр тоноп калған.* Р. Ғабдрахманов. *Таштуғайкай, һинең йылғакайың тонок кына аккан һыу икән* (Халык йырынан).

**ТОНОУ** [2] *к.* **1.** Томанһыу, һүрәнкегә әйләнеү; томанһыу, һүрәнке булыу. ■ *Бабай йоҡонан тонған, йәшкәҙәп торған йәшкелт күҙҙәрен асты.* Ғ. Дәүләтшин. *Тик йондоҙҙар бейеклектә берсә яныл, берсә тона.* М. Кәрим.

**2.** Көпләнгән, тығылған һымаҡ булыу. *Танау тона.* ■ *Сускаларҙың сыйылдауына, күҙ алдынан үткән имәнес картинаға минең иҫ китте, колаҡтар тонды.* Д. Юлтый. *Машина урамдан үткәндә, тәҙрәләр дер һелкенеп, колаҡ тоноп кала.* М. Хисмәтов.

♦ **Күҙ тоноу** *кар.* **күҙ.**

**ТОНСОҒОУ** (тоносоҡ*) *к.* **1.** Һауа етмәүҙән, саң, газдан тын ҡыҫылыу; быуылыу. *Тонсоғоп үлеү.* ■ *Күл үҫтө боҙ, кар менән нык ҡапланғанда, балыҡ .. тонсоға башлай, күпләп һәләк була.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 4 март.

**2.** *күсм.* Юҡка сығыу, юҡ булыу; дөмөгөү. *Дошман тонсоҡто.* ■ *Беҙ һеҙҙең өсөн бөтә һуғышты, һуғыш аскан батшаларҙы ҡарғайбыҙ, ләғнәтләйбеҙ. Шулар тонсоҡһон ине, тибеҙ.* Д. Юлтый.— *Ғәбәшемдең башын ашаны... Үҙе лә бер тонсоғор әле. Күҙ йәше ебәрмәй ул.* Н. Ғәлимов.

**3.** *күсм.* Ирекһеҙлек, ҡыҫынҡылыҡҡа интегеү. *Аңлайһың бит, мең йыл тыныл, тонсоғол йәшәгәнсә, бер көн яныл, ярһып йәшәүҙең ләззәтен.* З. Биишева.

**ТОНСОҠТОРҒОС** *с.* **1.** Тын алырға ауыр. *Тонсоҡторғос һауа.*

**2.** Тонсоҡтороп үлтергес. *Тонсоҡторғос газ.*

**ТОНСОҠТОРОУ** *к.* **1.** Тынды ҡыҫыу. *Тонсоҡтороп үлтереү.*

**2.** *күсм.* Юҡка сығарыу, юҡ итеү; дөмөктөрөү. *Дошманды тонсоҡтороу.*

**ТОНСОУ** [1] *к.* **1.** Һауа етмәүҙән тын ҡыҫылыу; тонсоғоу. *Тар биналарҙа тонсоп, бар ине яткан заман.* Д. Юлтый. / Тын алыу өсөн ауырға әйләнеү, ауыр булыу. *Тонсоған һауа.*

**2.** Боҙолоп һаҫыу (һыуға ҡарата).

**ТОНСОУ** [2] *с.* Тын алыу өсөн ауыр, тын тарыҡтырғыс. *Тонсоу бүлмә. Тонсоу көн. Тонсоу һауа.*

**ТО́НУС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. физиол.* Нервы һәм ағзаларҙың оҙаҡ ваҡыт арымай эшләү һәләте. *Тонусты күтәреү.*

**ТОНҠОС** [1] *и. диал.* Баш бала.

**ТОНҠОС** [2] *с. диал. кар.* **төпөш** [1].

**ТОП-** *киҫ.* **То*** ижеге менән башланған төп сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһе бирә. *Топ-тоҡос. Топ-тонок.*

**ТОПА́З** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Алтын һары, асыҡ зәңгәр һәм башҡа төҫтә йәки төҫһеҙ була торған бик ҡаты аҫыл таш. *Топаз ҡашлы йөҙөк.* ■ *Быяла шкаф эсендә топаз ята нурланып* (Халыҡ йырынан).

**ТОПО́ГРАФ** [*рус.*] *и.* Топография буйынса белгес.

**ТОПОГРАФИК** *с.* Топографияға мөнәсәбәтле. *Топографик карта. Топографик план. Топографик тамға.*

**ТОПОГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Геодезияның ер өҫтөн, уны үлсәү һәм картаға төшөрөү ысулдарын өйрәнә торған бүлеге.

**2.** Бер ил йәки өлкәнең ер өҫтө һәм уның пункттарының өлөштәренең үҙ-ара урынлашыуы. *Ҡаланың топографияһы.*

**ТОПОНИМИК** *с.* Топонимика һәм топонимияға мөнәсәбәтле. *Топонимик һүҙлек.*

**ТОПОНИ́МИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Берәй урындың (ауылдың, йылғаның, күлдең һ. б.) географик атамалары йыйылмаһы.

**2.** Ономастиканың географик пункт атамаларына әйләнгән яңғыҙлыҡ исемдәрҙе өйрәнә торған бүлеге.

**ТОПОНИ́МИЯ** [*рус.*] *и. кар.* **топонимика** 2.

**ТОПОШ: топош һөйәге** ҡулбаш һөйәге.

**ТОП-ТОЙОҠТАН** *р. диал.* Аңғармаҫтан.

**ТОП-ТОҠАНДАН** *р.* Һис бер сәбәпһеҙҙән, буштан-бушҡа. *Топ-тоҡандан әрләп китеү.*

**ТОРА-БАРА** *р.* Күпмелер ваҡыттан, бер аҙҙан. *Тора-бара Сәғиҙә ауыл тормошона күнегә башланы.* М. Тажи. *Башы ауырта башлай егеттең. Тора-бара бөтөнләй ауырыуға һабыша* (Әкиәттән).

**ТОРА-КИЛӘ** *р. кар.* **тора-бара.**

**ТОРАҠ** *и.* **1.** Ваҡытлыса туҡтап, урынлашып торған ер.

**2.** Пассажирҙарҙы ултыртып һәм төшөрөп китә торған урын. *Автобус торағы.*

**ТОРАРАҠ** *р.* Бер аҙҙан, әҙерәк торғас.

**ТОРАТАШ** *и.* **1.** Һерәйеп торған яңғыҙ ҡая таш.

**2.** Мәжүсиҙәр табына торған таш һын; бот.

♦ **Тораташ кеүек тороу** (*йәки* **ҡатыу**) төп-төҙ булып тороу йәки ҡатыу.

**ТОРБА** [1] [*рус.* труба] *и.* **1.** Шыйыҡлыҡ, пар, газ һ. б. йөрөү өсөн тәғәйенләнгән эсе ҡыуыш, ғәҙәттә йомро оҙон нәмә йәки ҡоролма. *Канализация торбаһы. Пар торбаһы.* ■ *Сәйҙеямал самауыр һыуын бушатып, торбаһындағы көлөн көлдөксәгә ҡаҡты.* Я. Хамматов. *Алтын фабрикаһындағы кочегарҙар ... торбаларҙан пар төкөртә.* Т. Хәйбуллин. *Пароходтар бара... Һыу өҫтөнә күкһел пәрҙә тартып, киң торбаның төтөнө тарала.* Ғ. Сәләм. / Шундай төҙөлөшлө оптик прибор йәки уның өлөшө. *Күҙәтеү торбаһы. Телескоп торбаһы.*

**2.** Киң ауыҙлы, еҙ, тынлы музыка ҡоралы. *Еҙ торбалар, үҙәкте өҙҙөрөп, матәм маршы уйнай.* Ф. Иҫәнғолов. / Граммофон, репродукторҙың һ. б. киң ауыҙы. *Граммофондар матур уйнай торбаһы киңгә күрә* (Халыҡ йырынан).

**3.** *кар.* **мөрйә** 2.

**ТОРБА** [2] *и.* Аттың башына элеп, һоло ашата торған тоҡсай.

**ТОРБАТ** *и. диал.* Ҡиәфәт, килбәт.

**ТОРБАТҺЫҘ** *с. диал.* Ҡиәфәтһеҙ, килбәтһеҙ.

**ТОРГ** [*рус.*] *и.* Сауҙа эшенә идара итеү ойошмаһы. *Ҡала торгы.*

**ТОРГЫ** [*рус.* торги] *и.* Кем күберәк хаҡ биреүҙән ойошторолған баҙар. *Торгы менән һатыу.*

**ТОРҒАҠ** *и. диал.* Торлаҡ.

**ТОРҒАЛЫҠ** *и.* **1.** Ат бәйләр өсөн ике осон бағана башына һалған буй ағас. *Аттар торғалыҡҡа бәйләнгән.* Т. Килмөхәмәтов.

**2.** *диал. кар.* **тороҡ** [2] 2.

**ТОРҒАНЫ** *билд. а.* Бөтә барлығы, бөтә булмышы. *Торғаны бер ялкау.* ■ *[Сынбулатов:] Һы, торғаны ут инде улар! Эшкә лә шәп, уйыныв*

*да булдыралар.* М. Тажи. *Ир-ат ни, катын-кыҙҙан башка торғаны бер кыҙрас инде: йә нокотлана, йә оңкотлана башлай.* Ғ. Вәлиев.

**ТОРҒОҘОУ** *к.* **1.** Үрә баҫтырыу, аякка калкытыу. *Аяк өҫтө торғоҙоу. Күтәреп торғоҙоу.* / Уятып түшәктән калкытыу. *Иртә торғоҙоу. Йоконан торғоҙоу.* ■ *Бәләкәй сакта атайым бахыр мине эшкә намаҙҙан торғоҙоп, һеләне корота торғайны.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Вертикаль хәлгә куйыу. *Ситәнде торғоҙоу. Ягаҙы торғоҙоу.*

**3.** Өйөп, короп ултыртыу; күтәреү. *Кәбән торғоҙоу.* ■ *[Ялсылар] үткер камсы аҫтында көс һалып, бер-бер артлы .. йорттар торғоҙа.* Т. Хәйбуллин.

**4.** *күсм.* Төҙөк хәлгә килтереү. *Хужалыкты торғоҙоу.* ■ *Совет кешеләре кала һәм ауылдарҙы торғоҙорға, яңыларын төҙөргә тотондо.* Э. Харисов.

**5.** *күсм.* Эшкә, хәрәкәткә күтәреү. *Халыкты иҙгенлеккә каршы торғоҙоу.*

◆ **Колакты торғоҙоу** *кар.* **колак.**

**ТОРҒОҘОШОУ** *к. урт. кар.* **торғоҙоу.**

**ТОРҒОН** *с.* Бер урында торған; хәрәкәтһеҙ. *Торғон һыу.*

**ТОРҒОНЛОК** *и.* Тормоштоң, эшмәкәрлектең берәй өлкәһендә үҫешһеҙ, үҙгәрешһеҙ туктап калған хәл. *Хужалыктағы торғонлок. Экономикалағы торғонлок. Торғонлок кисереү.* ■ *Инертлык, идара итеү формаларының һәм методтарының катып калғанлығы, эштә динамизмдың кәмеүе, бюрократизмдың артыуы — былар бөтәһе лә эшкә ҙур зыян килтерҙе. Йәмғиәт тормошонда торғонлок күренештәре төҫмөрләнә башланы.* «Совет Башкортостаны», 1986, 26 февраль.

**ТО́РИЙ** [*рус.* ⟨ *сканд.*] *и.* Химик элемент, аkһыл буҙ төҫтәге йомшак радиоактив металл (ядро энергетикаһында ядро яғыулығы алыу өсөн файҙаланыла).

**ТОРК** *окш.* Торна тауышын белдергән һүҙ. *Торк итеү.*

**ТОРКА** *и.* Һуғышта кейә торған корос баш кейеме.

**ТОРКОЛДАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **торколдау.** *Сәмәр хандың алты улы сыскан, йомран алды, ти, Заятүләк атлы улы каңғылдатып каҙ алды, ти, торколдатып торна алды, ти.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ТОРКОЛДАУ** *к.* Торк-торк итеү, торк-торк килеү. *Мөншөгөрө ултыра мөңкөлдәп, торнаһы оса торколдап.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТОРКОЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **торколдау.** *Тыуған якка һағыныу моңо бөркөп, торколдашып оса торналар.* А. Игебаев.

**ТОРКОН** *и. диал. кар.* **торок**[1] 1. *Оҙон торконло ат.*

**ТОРК-ТОРК** *окш.* Кабат-кабат торк иткән тауышты белдергән һүҙ. *Торна торк-торк итеп кыскырып, осоп китә* (Әкиәттән).

**ТОРЛАК** *и.* **1.** Тора торған урын. *Мал торлағы.* ■ *Һыуһар күп вакыт умарта корттарының ташлап киткән оянһында үҙенә торлак яһай.* К. Фәхретдинов.

**2.** Кеше йәшәй торған бина; йорт. *Дөйөм торлак. Торлак майҙаны. Торлак төҙөү.* // *Торлак йорт.* ■ *Йорттар емерелгән, бөтә фронт буйы менән халыктар, уларҙың бала-сағалары торлакһыҙ, асык һауала калған.* Д. Юлтый.

**ТОРЛАМА** *и. диал.* Тыраж.

**ТОРЛАТЫУ** *к.* Оҙак торорға яй куйыу. *Бисәкәйе Шәрифә уны торлатманы, таң беленер-беленмәҫтән мал янына кыуҙы.* Б. Бикбай.

**ТОРЛАУ** *к. күбр. юкл.* Түҙеп, оҙак тороу. *Бер урында торламай китеү.* ■ *Эйе, заводта эшселәр торламай икән. Бигерәк тә йәй айҙарында кеше күп китә.* З. Әхмәтов.

**ТОРМА** *и.* **1.** Әүернә сәскәлеләр ғаиләһенә караған куҙак орлоклo бакса үҫемлеге. *Торма сәсеү. Торма япрағы.*

**2.** Шул үҫемлектең кеше ашай торған кара кабыклы йыуан әсе тамыры. *Торма ашау.* ■ *Тормала һәм редиста кеше тәненә кәрәкле минераль тоҙҙар бар.* «Совет Башкортостаны», 1970, 6 июнь.

◆ **Тиле торма** һары әүернә сәскәле, куҙак орлоклo, киң оҙонса йөнтәҫ япраклы дала үләне.

**ТО́РМОЗ** [*рус.*] *и.* Машинаның йөрөшөн әкренәйтә, туктата торған корамал. *Автоматик тормоз. Аяк тормозы. Кул тормозы. Тормозға баҫыу. Тормоз биреү. Тормоз һалыу. Тормозды* [йәки *тормоздан*] *алыу.*

**ТОРМОЗЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **тормозлау.**

**ТОРМОЗЛАУ** *к.* **1.** Тормоз менән яйлатыу йәки туктатыу. *Машинаны тормозлау.*

**2.** *күсм.* Эш-хәрәкәттән, үҫеш, барыштан туктатыу. *Эште тормозлау.*

**ТОРМОШ** *и.* **1.** Донъяла йәки билдәле бер ерҙә йәшәү дәүере; ғүмер. *Тормош юлы.* ■ *Беҙҙең тормош алда әле, үҫтерербеҙ роза гөлдәрен.* Ғ. Сәләм.

**2.** Тереклек итеп, көн кисереү рәүеше; көнкүреш. *Ауыл тормошо. Ауыр тормош. Бәхетле тормош. Ғаилә тормошо. Күсмә тормош. Тормош мәнфәғәте. Тормош хәле. Тормош шарты. Тыныс тормош.* ■ *Вакыт уҙған һайын халыктың тормошо насарлана барҙы, халык фәкирләнде.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Ғаилә рәүешендәге көнкүреш. *Тормош короу. Тормошка биреү. Тормошта булыу.* ■ *Дүрт баланы карарға хәленән килмәгәс, әсәйем икенсе ирgә тормошка сыкты.* М. Тажи.

**4.** Төрлө хәл, күренештән торған булмыш; донъя. *Ижтимағи тормош. Кешелек тормошо. Мәктәп тормошо. Хужалык тормошо. Тормошка аяк баҫыу. Тормошто аңлау. Тормоштоң кәҙерен белеү.* ■ *Көндәр бер-бер артлы алға йүгерҙе. Арты менән торған тормош йәш Шәрәйгә бите менән боролдо.* Т. Йәнәби.

**5.** *кар.* **тереклек** 2.

◆ **Тормошка аткарыу** (*йәки* **ашырыу**) ғәмәлләштереү. *Ашығыс хәбәрҙе хәҙерҙән үк тормошка аткарыу өсөн йыйылыштағылар йылдам-йылдам ауылдың төрлө яктарына тарала.* И. Көҫәпкол. **Тормошка ашыу** ғәмәлләшеү.

**ТОРМОШ-КӨНКҮРЕШ** *и. йыйн.* Тереклек итеп йәшәгән көн. *Тормош-көнкүреш хәле.*

**ТОРМОШЛАНДЫРЫУ** *к.* Ғаиләле итеү; өйләндереү.

**ТОРМОШЛАНЫУ** *к.* Ғаилә тормошо короу; өйләнеү.

**ТОРМОШЛО** *с.* **1.** Ниндәйҙер тормошҡа эйә. *Мул тормошло колхоз.* ■ *Күршеләге иркен тормошло кешеләр күп ваҡыт итле аш бешерә.* М. Ғафури.

**2.** Ғаиләле. *Тормошло кеше.*

□ **Тормошло булыу** өйләнеү; иргә сығыу. **Тормошло итеү** өйләндереү; кейәүгә биреү.

**ТОРМОШСАН** *с.* **1.** Тормош талабына ярашлы. *Тормошсан фекер.*

**2.** Тормошҡа яҡын. *Тормошсан әҫәр.*

**ТОРМОШСОЛ** *с.* **1.** Тормош көтөүгә шәп; йүнсел. *Тормошсол кеше.*

**2.** *кар.* **тормошсан** 1.

**ТОРНА** *и.* Оҙон сираҡлылар ғаиләһенә ҡараған оҙон аяҡлы, оҙон муйынлы, оҙон суҡышлы, ҡыҫҡа ҡойроҡло эре күсәр һаҙ ҡошо. *Торна тауышы.* ■ *Ҡанатын елпеп йүгерә һауаға осор мәлдә; ҡамыштан бейек күренә баҫып торған ерендә. «Ниндәй ҡош?» — тип һораһағыҙ, уның исеме торна.* С. Кулибай. *Торна иртә килһә, иртә йылыта.* Һынамыш.

♦ **СеЛән торнаһы** *диал.* мөнһөгөр. **Торна еләге** *шул уҡ* **ҡурай еләге** (*кар.* **еләк**). **Торна тубығынан** *кар.* **тубыҡ** [1].

**ТОРО** *бәйл. кар.* **оторо** 4.

**ТОРОҒОУ** (тороҡ⸗) *к.* Айғыр менән ҡауышыу; аталаныу (бейәгә ҡарата). *Тороҡҡан бейә ул [Аҡбәкәл], бер нәҫел айғырынан.* Р. Солтангәрәев.

**ТОРОҠ** [1] *с.* **1.** Йығылмаған, ығып ятмаған, төп-төҙ ултырған (иген, үҫемлек һ. б. ҡарата). *Тороҡ игенде урыуы еңел.*

**2.** Ел ҡаҡмаған, хәрәкәтһеҙ тороп тынсыу булған. *Бараҡтағы тороҡ һауа тын алырға бирмәй.* Ш. Бикҡол.

**ТОРОҠ** [2] *и.* **1.** Кешенең, йәнлек, хайуандың буй-һыны. *Ҡыҫҡа тороҡло ат. Оҙон тороҡло кеше.* ■ *Полк командиры Таһир Кусимов бейек кәүҙәле, оҙон тороҡло арғымағынан һикереп төштө.* Ә. Ихсан.

**2.** Төҙөлөш, ҡоролманың ике бағана араһындағы буйы. *Тороҡҡа һуҙыу.* ■ *[Ғариф:] Әхтәри ҡарттың өйө тирәһен кәртәләп ҡуйыу кәрәк. Биш-алты тороҡ кәртә етә.* Ж. Кейекбаев. *Күперҙең дүрт торого емерелде.* А. Таһиров.

**ТОРОҠЛАЙ** *р.* Торған көйө, үҫеп ултырған көйө. *Йүкәне тороҡлай һүйыу.*

**ТОРОҠТОРОУ** *к.* Айғырға ҡушыу; аталандырыу (бейәне). *Һалма рәүештә тороҡтороу.*

**ТОРОЛОУ** *к. эйһ. ф. кар.* **тороу** 1. *Бөгөн иртә торолдо.*

**ТОРОМ** *и.* Торған урын; тораҡ. *Мал торомо.* ■ *Йылҡылар баҫып уҙа. Ул саҡта Көтөр батыр ҡаҙаҡтарҙың торомонан салып өлгөрә, әҙернәгә һаҙаҡ ҡуйып тоҫҡай* (Хикәйәттән).

**ТОРОМТАЙ** *и.* Ылаһындар ғаиләһенә ҡараған оҙон осло ҡанатлы, ҡыҫҡараҡ ҡойроҡло, күкшел-буҙ һыртлы, ҡыҙғылт һары ҡорһаҡлы, кимереүселәр һәм бөжәктәр менән туҡланған ваҡ йырткыс ҡош. *Торомтайҙан йылғыр ҡош булмаҫ* (Ҡобайырҙан).

**ТОРОМ-ТОРОМ** *р. диал.* Кимгел-кимгел.

**ТОРОН** [1] *и. иҫк.* Ҡыҙҙың йәки улдың улы; ейән. *Ҡәҙерле нәнә үҙенең шаян торондарының уҡ, ян менән уйнағанын рәхәтләнеп ҡарап тора.* «Ек Мәргән».

● *Торонһоҙ кеше — тамырһыҙ ағас.* Мәҡәл.

**ТОРОН** [2] *и.* **1.** Тыштан яны ҡуҙланған, күмерләнгән ағас киҫәге; торонбаш. *Һәр көн торондарға әүерелә шаулап торған нәфис урмандар.* Х. Ҡунаҡбай.

**2.** Игендең башағын ҡап-ҡара саңға әйләндерә, орлоғон ҡарайтып ҡатыра торған ауырыу. *Торон бәшмәге. Торон саңы. Торон һуға.* ■ *Байтаҡ арыш, бойҙай сәсеүлеген торон баҫты.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 26 август.

**ТОРОНБАШ** *и.* Тыштан яны ҡуҙланған, күмерләнгән ағас киҫәге; торон [2]. *Кемдеңдер ут яғып аш бешергән урыны бар, торонбаштар ята.* А. Таһиров.

**ТОРОНЛАНЫУ** *к.* Торонға, торонбашҡа әйләнеү. *Утын торонланғас ҡына, [һунарсылар] өңдөң ауыҙын томалап ҡуя.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 10 март.

**ТОРОНЛАУ** *к.* Торон ауырыуы менән зарарланыу. *Торонлаған иген.*

**ТОРОНСА** *и. иҫк.* Улдың йәки ҡыҙҙың ҡыҙы; ейәнсәр.

**ТОРОП** *киҫ.* Хәл ҡылымдың ⸗п формаһы менән бергә ҡулланып, мәғәнәне көсәйтә. *Бәреп тороп ебәреү. Тирләп тороп сәй эсеү.* ■ *Төшкә таба һыу ысынлап тороп күперҙе ҡаҡшата башланы.* Б. Дим.— *Рәхмәт, балаҡайым, хәҙер шәбәйҙем инде,— тиһәм, Сәлимәм рәхәтләнеп тороп көлә.* Х. Түләкәев.

**ТОРОУ** *к.* **1.** Аяҡ үрә баҫыу, аяҡҡа ҡалҡыу. *Һикереп тороу. Урындан тороу.* ■ *Ҡарт тубыҡлана-тубыҡлана ерҙән торҙо.* М. Тажи. / Уяныу, түшәктән ҡалҡыу. *Йоҡонан тороу. Иртә тороу. Иртә менән тороу. Таң менән бергә тороу.* ■ *Иртәнсәкәй тороп, бер ҡараһам, күк үләнкәй үҫкән юлыма* (Халыҡ йырынан).

**2.** Баҫҡан хәлдә ҡайҙалыр урын алыу. *Ағас төбөндә тороу. Күҙгө алдында тороу. Сиратта тороу. Тәҙрә янында тороу.* ■ *[Әмирханов] кеҫәһенән бер бәйләм асҡыс сығарып, янында торғандарҙың береһенә һуҙҙы.* С. Агиш. / Шул хәлдә бер төрлө шөғөл менән булыу. *Ҡарауылда тороу. Һаҡта тороу. Станок янында тороу.* ■ *Ҡайтыр ғына инем мин илемә — алдым-артым торған ҡарауыл* (Халыҡ йырынан). / Ҡайҙалыр урын алыу; урынлашыу. *Полк ҡалананситтә тора.* / Ниндәйҙер көскә, һөжүмгә ҡаршылыҡ күрһәтеү өсөн ныҡлы урын алыу. *Дошманға ҡаршы тороу. Оборонала тороу.*

**3.** Вертикаль хәлдә булыу. *Бағана тора. Ҡаҡҡан ҡаҙыҡ тора. Үрә тороу.* / Баҫтырып, ултыртып ҡуйған хәлдә булыу. *Баҫҡыс ҡойма буйында тора. Өҫтәл уртала тора.* ■ *Тирмәм тора көмөш кеүек йылға ярында.* Салауат Юлаев.

**4.** Хәрәкәтһеҙ хәлдә булыу. *Тыны бөтөп, хәле бөтөп, бер аҙ торғас, башланы ул [берәү] һүҙ һөйләргә.* «Бабсаҡ менән Күсәк». | Ниндәйҙер бер хәлдә булыу. *Булмә буш тора. Тәҙрә асыҡ тора.* ■ *[Ныязгол:] Ярай әле хәҙергә минең малым теүәл тора.* Һ. Дәүләтшина. / Ҡайҙалыр,

нимәләләр һаҡланыу. *Кейем-һалым тора торған урын. Ел көслө булһа .., аш-һыу тора торған ыҙыстарға [көл] тулып бөтә.* Ғ. Дәүләтшин. / *күсм. юкл.* Һаҡлай, тота белеүгә ҡарата. *Уның ауыҙында һүҙ тормай. Ҡулында аҡса тормай.*

**5.** *күсм.* Кемде йәки ниҙәләр яҡлап, ниндәйҙер ҡарашта, фекерҙә булып, шул яҡты тотоу. *Дөрөҫлөк яғында тороу. Халыҡ яғында тороу.*

**6.** *күсм.* Күҙ уңында, алда булыу. *[Айбулат:] Һинә бит иртәгә юлға сығыу эше лә тора.* Һ. Дәүләтшина. / Фекерҙә, уйҙа булыу. *Башта бер һорау тора. Исеме тел осонда тора.*

**7.** Ғүмер итеү; йәшәү *Ауылда тороу. Бергә тороу. Квартирҙа тороу.* ■ *Бейек торлаҡтарҙа эшсе семьялары торалар.* Ғ. Сәләм. *Торған ерҙә һағынам тыуған ерҙе, тыуған ерҙә — торған еремде.* Н. Нәжми. / Хеҙмәттә, эштә ағзалыҡта булыу. *Комсомолда тороу.* ■ *Йәрмәкиҙең муллалыҡта тормағы мәғкүл түгел.* Ш. Бабич. / Ниндәйҙер ижтимағи мөнәсәбәттә йәки хәлдә булыу. *Бәйләнештә тороу. ЗАГС-та тороу.*

**8.** Ғибәрәт булыу. *Ғаилә биш кешенән тора. Өй өс бүлмәнән тора.* / Нимәгәләр ҡайтып ҡалыу. *Мәсьәлә уның ризалығында тора. Эш һиндә тора.*

**9.** Ниндәйҙер баһаға, әһәмиәткә эйә булыу. *Дошман алһа ереңде, пыр туҙҙырһа илеңде, .. айбарлауың ни торор.* Р. Ниғмәти. *Иҫән саҡта уҡ улар йәшәп бөтә һуҡыр тингә тормаҫ гүмерен.* М. Хәй. / Ниндәйҙер хаҡ, баһаға эйә булыу. *Китап ике һум тора. Ҡәләм ни хаҡ тора?*

**10.** Ҡушар ҡылымдарҙың беренсе компоненты булып ҡатмарлы мәғәнә белдерә. *Тороп баҫыу. Тороп йөрөү. Тороп китеү. Тороп ҡалыу.* / Ҡатмарлы ҡылымдың беренсе компоненты булып, эш-хәрәкәттең ҡапыл булғанын белдерә. *Тороп йүгереү. Тороп ҡасыу.*

**11.** Ҡатмарлы ҡылымдың икенсе компоненты булып, ниндәйҙер хәлдә ҡалғанды, ниндәйҙер эш-хәлдә булғанды белдерә. *Аптырап тороу. Баҫып тороу. Ебеп тороу. Көтөп тороу. Күреп тороу. Ҡарап тороу. Өндәшмәй тороу. Түҙеп тороу. Тыңлап тороу. Уйлап тороу. Һағалап тороу. Һоҡланып тороу. Һөйләп тороу.* ■ *Тауҙарым бейек, торалар күкһел болотҡа тейеп.* М. Хәй.

**12.** *-п* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында ҡушма ҡылым яһай: а) эш-хәлдең дауамлылығын, даимилеген белдерә. *Аяҡ ауыртып тора. Балҡып тороу. Еҫ сығып тороу. Көн боҙолоп тора. Ҡарайып тороу. Шаулап тороу. Ялтырап тороу.* ■ *Ҡышҡы ҡояш көлөп торһа ла йылыһы юҡ.* Ш. Янбаев; б) ҡабатланып килгән даими эш-хәлде белдерә. *Хат яҙып тороу. Хәбәр алышып тороу.* ■ *Өмөтбайҙың бисәһе иҙәндең сокор-саҡырҙарын әлдән-әле тигеҙләп һылап торғанға, .. ул тип-тигеҙ булып ҡатып киткән.* Ғ. Дәүләтшин. *Бер-бер артлы шешәләр бушап тороуҙар бар ине.* Ш. Бабич; в) эш-хәрәкәттең билдәле бер мәлгә тиклем башҡарылғанын белдерә. *Аҡса биреп тороу. Ҡайтып тороу. Сығып тороу.* ■ *Ҡәмәр әбей бала саҡтан уҡ үҙе менән ҡорҙаш булып үҫкән Сәғиҙә әбейҙең батшай сапанын, һары ситеген ҡунаҡҡа барырға алып торҙо.* Ғ. Дәүләтшин; г) эш-хәрәкәтте ҡайһылыр бер мәлдән алда башларға кәрәклеген белдерә. *Ашай тороу. Бара тороу. Китә тороу. Эшләй тороу;* д) тейешле булһа ла, башҡарылмаған эш-хәрәкәтте белдерә. *Аҡса түләп тормай. Һатыулашып тормай. Бер нәмә лә уйлап тормай;* е) тейешһеҙ ерҙән ғәмәл булған эш-хәлде белдерә. *Бер нәмә сығып тора. Табылып тора.* ■ *— Әрәм тамаҡ,— тине Хөсәйен,— ҡайҙан табып тора шәригәтен.* Һ. Дәүләтшина.

**13.** *-а* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында эш-хәлдең бер ыңғай менән дауам иткәнен белдерә. *Заман үҙгәрә тора. Йылдар уҙа тора.* ■ *Бара ла ғына торғас бер ултырҙым, аяҡайҙарым талып барғанға* (Халыҡ йырынан).

**14.** *-ырға* формаһындағы ҡылымға ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында шул мәлдә башҡарырға әҙерләнгән ниәтте, эш-хәрәкәтте белдерә. *Китергә тороу. Ҡайтырға тороу. Ямғыр яуырға тора.*

**15.** *-а* формаһындағы хәл ҡылымға сифат ҡылым формаһында ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында ҡушма ҡылым яһай: а) кемдең йәки ниҙәңдер эш-хәрәкәт менән билдәләнгән төп сифат, маҡсатын белдерә. *Бесән өйә торған машина. Һыу ташый торған күнәк. Эшен булдыра торған егет.* ■ *Беҙ инде төшкә // ышанмай торған кешеләр.* Б. Бикбай; б) эш-хәрәкәт менән билдәләнгән ваҡытлы сифатты белдерә. *Ала торған аҡса.* ■ *Иптәштәрҙең .. бара торған урыны булһа, ҡарауылда Новиков үҙе генә тороп ҡала.* Д. Юлтый.

**16.** *-а* формаһындағы хәл ҡылымға *-дыр* аффиксы менән ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында фаразды белдерә. *Ике йәш йөрәктең семья башы шулай башлап китә торғандыр.* Ғ. Сәләм.

**17.** *-а* формаһындағы хәл ҡылымға *-ғайны* формаһында ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында шаһитлы күптән үткән заман формаһы яһай. *Ул [апай] беҙҙең сәстән һыйпай, арҡанан һөйә торғайны.* С. Агиш.

**18.** *-а* формаһындағы хәл ҡылымға *-п* формаһында ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында аналитик рәүеш яһай. *Белә тороп эшләү.* ■ *Шарттар була тороп умартасылыҡҡа иғтибар юҡ. Әсәйемде терелтмәй тороп һинең менән бергә була алмайым* (Әкиәттән).

◆ **Бына [ғына] тора** *ҡар.* **бына. Ни тора** юғары кимәл, дәрәжәне аңлатҡан баһаны белдерә. *Хурлығы ни тора.* **Ситтә торһон** *ҡар.* **сит**[1]. **Торған һайын** һаман. *Ҡояш торған һайын көләсерәк, сағыуыраҡ балҡый.*

● *Тыуғаныңа ҡыуанма, торғаныңа ҡыуан.* Мәҡәл.

**ТОРОШ**[1] *и.* **1.** Баҫып торған хәл. *Хәким бабай .. көрәгенә таянып, башын эйеп, хәсрәтле уйҙарға батып тора ине. Уның шул торошо хәтеремдә нык һаҡланған.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Ниҙәңдер ошо мәлдә булған хәле. *Сәсеүгә әҙерлек торошо. Эштең торошона тәрән анализ яһау.* ■ *Бөтә республика буйынса һауа бассейнының радиоактив торошона даими контроль*

*урынлаштырылған.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 27 май.

**3.** Көн күреп торған, йәшәгән хәл; тормош. *[Башҡортостан], һөйлә олатайҙар хәлдәрен, йөрөш, торош, заңын, йолаһын.* Ш. Бабич.

**ТОРОШ** [2] *с.* Сифаты, эһәмиәте, кимәле менән кемгә йәки нимәгәлер бәрәбәр булырлыҡ; тиң, торошло. *[Заҙа:] Зифаның төҫө лә, эше лә ун ҡыҙға торош.* С. Кулибай.

□ **Торош итеү** тиң булыу, тиң тороу.

**ТОРОШЛО** *с.* **1.** Ниндәйҙер бер яғы менән кемгә йәки нимәгәлер бәрәбәр булырлыҡ; тиң торорлоҡ. *Үс иткәндәй көнө лә икее-с көнгә торошло — капыл оҙайҙы ла китте, кәрәк сағында етмәй ҙә кала торғайны.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Күпмелер хаҡҡа тиң баһалы. *Мең һум торошло өй.*

**ТОРОШЛОҠ: торошлоҡ итеү** бәрәбәр булыу, тиң тороу. *[Ҡыҙ — Тарғынға:] Ҡужаҡтың .. хәҙер йәше алтмыш биштә, һиңә торошлоҡ итә алмаҫ, ти* (Әкиәттән).

**ТОРОШОУ** *к. диал. ҡар.* **алышыу** [2]. *Айыу менән торошоу.*

**ТОРОШ-ҺЫН** *и. йыйн.* Тышҡы ҡиәфәт. *[Платовтың] торош-һыны ла нык үҙгәргә. Оло йәштәгеләргә оҡшатып, бөкрәйеберәк, һалмаҡ баҫып атларға өйрәнде.* Д. Исламов.

**ТОРПА(Й)** *с.* Ҡырыҫ мөнәсәбәтле, ҡаты һүҙле.

**ТОРПАҠ** *и.* Үгеҙ башмаҡ.

**ТОРПЕДА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Үҙе йөрөмәле һәм сәпкә үҙе йүнәлмәле сигара рәүешендәге һыу аҫты снаряды. *Торпеда ебәреү.*

**ТОРПЕДАЛАУ** *к.* Торпеда менән атыу.

**ТОРПЕДАСЫ** *и.* Торпеда аппаратын хеҙмәтләндергән хәрби моряк.

**ТОРПО** *и. диал.* Өс йәшлек һыйыр.

**ТОРТ** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* Һөткә, майға баҫылған сөсө ҡамырға крем, еләк-емеш һ. б. ҡушып бешергән кондитер ашамлыҡ.

**ТОРФ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Һаҙ үләндәренең баҫылып, тулыһынса серемәй тарҡалыуынан барлыҡҡа килгән яна торған файҙалы ҡаҙылдыҡ (яғыулыҡ, ашлама һ. б. итеп ҡулланыла). *Торф яткылығы.*

**ТОРФЛЫ** *с.* **1.** Торфы булған. *Торфлы һаҙлыҡ.*

**2.** Торфтан эшләнгән, торфтан алынған. *Торфлы брикет. Торфлы кокс.*

**ТОРФЛЫҠ** *и.* Торф ятҡылығы.

**ТОРШЕР** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Иҙәнгә ултыртыла торған оҙон аяҡлы яҡтыртҡыс.

**ТОС** [1] *с.* **1.** Күләменә ҡарата ауырлығы ҙур; һәлмәк. *Тос башаҡ. Тос йоҙроҡ. Тос орлоҡ. Тос ысыҡ тамсыһы.* ■ *Арҡаһына бестерәүләп тос ҡына әйбер артмаҡлаған был егет Баҡый ауылынан сығып, .. тауға үрелде.* Ж. Кейекбаев. *[Нурфәиздең] имән түйраһындай тос, көслө кәүҙәһе, йәшәүҙән айырылғыһы килмәй, үлем менән оҙаҡ көрәште.* Ш. Янбаев.

**2.** Сит нәмә ҡатышмаған; таҙа, сифатлы. *Тос ит. Тос май.* ■ *Бисәһенең сулпыһы тос алтындан эшләнгән.* «Батыршаның хаты».

**3.** *күсм.* Ыҡсым, ҙур йөкмәткеле. *Тос әҫәр. Тос өлөш.* ■ *[«Погонһыҙ һалдаттарҙа»] гәжәп тос поэтик һәм психологик деталдәр, эске монологтар, .. урта телмәр бик киң ҡулланыла.* Ә. Вахитов.

♦ **Тос йылан** *шул уҡ* **баҡыр йылан** (*ҡар.* **йылан**).

**ТОС** [2] *и. диал. ҡар.* **ем** 4.

**ТОСЛАУ** *к.* Игенде төйөп, көбөнән әрсеү. *Бойҙайҙы тослау.*

**ТОСТ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Теләк, ҡотлау һүҙе менән белдерелгән эсеү тәкдиме. *Тост әйтеү.* / Шул тәкдим менән эселгән шараплы бокал. *Тост күтәреү.*

**ТОҪҠАЛ** *с. диал. ҡар.* **мәргән** [1].

**ТОҪҠАЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **тоҫҡау.** *Тоҫҡалған мылтыҡ.*

**ТОҪҠАМА** *и.* Бер урындан икенсе бер сығанаҡҡа йәки һүҙгә тоҫҡаған күрһәтмә. *Тоҫҡама яһау. Тоҫҡама биреү.*

**ТОҪҠАН** *и. иҫк. ҡар.* **ҡамау** [2] *Тоҫҡанға алыу.*

**ТОҪҠАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **тоҫҡау.** *Мылтыҡ тоҫҡатыу.*

**ТОҪҠАУ** *к.* **1.** Туралап йүнәлтеү, төбәү. *Мылтыҡты тоҫҡау. Уҡты тоҫҡау. Тоҫҡап атыу.* ■ *«Ана тора ҡуш ҡайын..»,— тип, Ғәйни ағай бармағы менән тоҫҡап күрһәтте.* Т. Йәнәби. / Туранан тура йүнәлтеү; төбәү. *Тоҫҡап әйтеү.*

**2.** Туралап йүнәлеш алыу. *Кәбәнгә тоҫҡап барыу.* ■ *Арыҡ атҡа атланып, .. ҡайҙа юлың тоҫҡаның?* (Ҡобайырҙан).

**3.** Иғтибар йүнәлтеп, күрһәтеү. *Төп сығанаҡҡа тоҫҡау.*

**ТОҪҠАУСЫ** *и.* Атыр өсөн тупты сәпкә тоҫҡап торған һуғышсы.

**ТОҪҠАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **тоҫҡау** 1.

**ТОҪМАЛ** *и.* Ихтималлылыҡтан сығып билдәләнгән сама; фараз. *Юлды яҡшы белмәй, тоҫмал менән барыу. Тоҫмал менән әйтеү.*

□ **Тоҫмал итеү** эҙ-мәҙ билдә буйынса самалау; тоҫмаллау. *Атайымдың тоҫмал итеүенсә, был бүре Ҡашҡарҙың инәһе ине.* С. Кулимбай.

**ТОҪМАЛЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **тоҫмаллау.** *Ир гәйрәте тоҫмаллана был үрәнсеү, ярһыуҙа.* Х. Назаров.

**ТОҪМАЛЛАУ** *к.* Эҙ-мәҙ билдә буйынса самалау. *Беҙ йәнә тауыштарға ҡарап, һаман алғы һыҙыҡ яғын тоҫмаллап атлауҙа булдыҡ.* Д. Юлтый. *Юл-фәлән юҡ. Тик түбәнең йүнәлешен тоҫмаллап ҡына барабыҙ.* Н. Ҡәрип.

**ТОТ** *и. иҫк.* Үҫ, ҡон.

**ТОТАҠЛАШЫУ** *к. диал.* Тотонношоу. *Тотаклашып барыу.*

**ТОТАЛҠА** *и.* Таратмай, ысҡындырмай тотоп торған ныҡлыҡ. *Ҡарҙар яҙ башланыу менән иреп, тау битендә тоталҡа булмау сәбәпле, сабышып-сабышып түбән тәгәр[ләй].* Ғ. Дәүләтшин.

**ТОТАЛҠАЛЫ** *с. диал.* Тотанаҡлы. *Тоталкалы кеше.*

**ТОТАЛҠАҺЫҘ** *с.* **1.** Тотҡарлыҡһыҙ, тотороҡһоҙ. *Юғарынан бер ниндәй тоталкаһыҙ баш түбән тәкмәс атҡан сакта ярты юлда тукталып ҡалыуҙары ай-һай бик еңел түгел шул.* Ғ. Вәлиев.

**2.** *диал.* Тотанаҡһыҙ.

**ТОТАЛЬ** [*рус*. тотальный ⟨ *фр.*] *с. кит.* Бөтә нәмәне эсснә алған киң күләмле; дөйөм. *Тоталь һуғыш.*

**ТОТАМ** *и.* **1.** Ус аяһына тиң булған оҙонлоҡ үлсәме. *[Зилский] һакалын ярты тотам самаһы игеп ҡырҡкан.* Ғ. Дәүләтшин. *Ҡурайҙың оҙонлоғо төрлөсә: сәсән ҡурайы һигеҙ тотам, ҡурайсы ҡурайы туғыҙ тотам.*

**2.** Уска алып тоторлоҡ күләм үлсәме. *Бер тотам бесән. Бер тотам йүкә.* ■ *Ваһап ҡарт кәзә һуйғанда уландарына бер тотам эсәк-ҡарын биреп ебәрҙе.* Ж. Кейекбаев.

♦ **Бер тотам да ҡалмау** кем йәки ниҙер артынан эҙ генә лә ҡалмау. *Бер тотам ҡалмай эйәреү.* ■ *Биктимер ҙә эсәһенең артынан бер тотам да ҡалмай.* Ә. Вахитов. **Бер тотамдан** берҙәм рәүештә, бер төптән. *Ауыл күштандары: «Ай-һай!.. һеҙ бер эш боҙоп ҡайтманығыҙмы икән, бөтәгеҙ бер тотамдан ҡайтып килгәнһегеҙ",— тине.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**ТОТАМЛАУ** *ҡ.* **1.** Тотам берәмегенә һалыу. *Тотамлап үлсәү.*

**2.** Арттан ҡалмай тағылыу. *Тотамлап эйәреү. Тотамлап йөрөү.*

**ТОТАНАҠ** *и.* **1.** Нимәнеңдер үҙ сифатын һаҡлау һәләте, көсө. *Ҡомло тупраҡтың тотанағы юҡ, ҡаҙған саҡта ишелеп тора.*

**2.** *диал.* Тапма.

**ТОТАНАҠЛАУ** *ҡ.* Аумаһын йәки таралмаһын өсөн ян-яҡтан тотоу. *Әсәйемде тотанаҡлап алып сығып, арбаға йомшаҡ урынға яткырҙыҡ.* Й. Солтанов.

**ТОТАНАҠЛЫ** *с.* Үҙен үҙе ипле, сабыр тотоусан; тыйнаҡ. *[Ғариф:] Насар ҡатын[ға] .. окшамай. Тотанаҡлы ғына аҡыллы ҡатын күренә.* Н. Иҙелбай.

**ТОТАНАҠҺЫҘ** *с.* **1.** Үҙ үҙен ипһеҙ, тәрбиәһеҙ тотоусан; тыйнаҡһыҙ. *Тотанаҡһыҙ бала.*

**2.** Сер тотмай, һүҙ ташыусан. *[Йомабикә:] Бынау беҙҙең арала йөрөгән Кусбикә тотанаҡһыҙ, ни генә һөйләнмәһен — бай бисәһенә түкмәй-сәсмәй яҙырып тик тора.* Т. Хәйбуллин.

**ТОТАШ** [1] *с.* Сик, араға бүленмәй, бергә ҡушылыулы. *Тоташ таж япраҡлы сәскә.*

**ТОТАШ** [2] *р.* **1.** Бер юлы, бер ыңғай; рәттән. *Әнтерәй өс көн ятты тоташ өйөндә, станоғы өсөн көйөнмәй.* М. Тажи.

**2.** *диал. ҡар.* **тотош** [2].

**ТОТАШТАН** *р.* Бер ыңғайҙан; өҙөкһөҙ. *Ул үҙе өс йыл буйы тоташтан фронтта йөрөгән.* Ғ. Дәүләтшин. *Бер тоташтан ике йыл ауырып, [ҡатыны] ахырҙа үлеп ҡуйҙы.* И. Көсәпҡол.

**ТОТАШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **тоташтырыу.**

**ТОТАШТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Үҙ-ара беректереү, бергә беркетеү. *Таҫманың ике осон тоташтырып торған бәләкәй генә төймәһе лә бар, ти* (Әкиәттән). | Төп сығанаҡҡа, электр сымына ялғау. *Телефон тоташтырыу. Электрҙы тоташтырыу.*

**2.** Ике араны бергә ҡушыу. *Ике ярҙы тоташтырған күпер.* ■ *Район үҙәген Ағиҙел буйы колхоздары менән тоташтырған берләм юлдан ырамлы ғына юрта Ерәнсәй.* Т. Килмөхәмәтов.

**ТОТАШЫУ** *ҡ.* **1.** Үҙ-ара ҡушылыу; ялғаныу. *[Хисам ҡарт] яҙын Ташлыйылғаның боҙо ҡуҙғалып киткәндән алып, көҙгө сыйҙымдар тоташҡанса һыу буйынан ҡайтмаҫ ине.* М. Тажи. / Барып терәлеү, ялғаныу. *Болотҡа тоташыу. Күккә тоташыу. Көн төнгә тоташа.* ■ *[Килдебайҙың] нәҙек мыйығының ике осо һаҡалына килеп тоташҡан.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Икәү-ара бәйләнеү. *Күпер менән тоташыу. Күл йылғаға ҡылы менән тоташа.*

**ТОТЕ́М** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Ырыу-ҡәбилә йәмғиәте ваҡытында ҡайһы бер ырыу төркөмөнөң нәҫел башы, ырыу терәге итеп табынған нәмә, йәнлек, үҫемлек йәки тәбиғәт күренеше. *Һәр ырыуҙың үҙ исеме генә түгел, үҙ тотемы, үҙ ораны булған. Тотем менән оран итеп башҡорттар ҡоштарҙы, ағастарҙы йөрөткән.* «Ағиҙел», 1969, № 1.

**ТОТЕМИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Ырыу ҡоролошонда билдәле бер ырыу төркөмөнөң берәй тотемға табыныу менән характерланған йолаларҙың бик боронғо формаһы.

**ТОТЕМИСТИК** *с.* Тотемизмға мөнәсәбәтле. *Тотемистик йола. Тотемистик ҡараш.*

**ТОТҠА** *и.* **1.** Һәр төрлө нәмәнең тотоп аса, күтәрә, эшләтә торған өлөшө. *Ишек тотҡаһы. Көршәк тотҡаһы. Салғы тотҡаһы. Сынаяҡ тотҡаһы. Тәҙрә тотҡаһы. Һандыҡ тотҡаһы. Елгәргес тотҡаһы.*

**2.** *күсм.* Ниҙелер хәл итер, бар итер терәк, сара. *Донъя тотҡаһы.* ■ *Ир уртаһы илдең тотҡаһы тип, ҡарай беҙгә бөгөн ил күҙе.* Р. Бикбаев.

**ТОТҠАР** *и.* **1.** Юлға кәртә булған ҡаршылыҡ. *Ҡыҫыҡтан атлы кешеләр ҡара-ҡаршы килеп уҙа алмай. Береһе уҙғанда икенсеһе алыҫта көтөп тора. Ә йәйәүлегә тотҡар юҡ.* З. Биишева. *Барышлай Түбән Ҡыштымды ситләтеп үтеп, ике завод юлын бүлеп, илле кешелек тотҡар ҡалдырҙылар. Түбән заводтағылар ярҙамға килергә уйлаһа, юлдарын киҫмәгә.* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** *күсм.* Эш-ҡылыҡҡа кәртә ҡуйған ҡаршылыҡ. *Тотҡар һалыу.* ■ *[Ярсы:] Мин ҡыҫҡырам һеҙгә яр, бөгөн бейҙән әмер бар, бер кемгә лә тотҡар юҡ, ихтыярлы һунар.* «Бикйән Мәргән».

**ТОТҠАРЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **тотҡарлау.** *Материал етешмәгәнлектән ремонт эше тотҡарланыу.*

**2.** Тотҡарлыҡ кисереү; туҡтау. *[Зина] бөгөн аптеканан дарыуҙар алып йөрөп тотҡарланғайны. Бына әле шуға эшселәр янына диләнкәгә ашыға.* Н. Мусин.

**ТОТҠАРЛАУ** *ҡ.* Кәртә йәки ҡамасау һалып, эш-хәрәкәтте күпмелер ваҡытҡа тотоу, туҡтатыу. *Ямғыр урак эштәрен тотҡарлай. Ваҡ нәмәләр йыш ҡына ҙур эштәрҙе тотҡарлай.*

**ТОТҠАРЛЫҠ** *и.* **1.** Юлдағы хәрәкәткә ҡамасаулаған ҡаршылыҡ. *Улар [танкистар] бер танкыла бергә булғанда, еңеү үҙе килә, юлда бер төрлө тотҡарлыҡ та булмай.* Һ. Әсәдуллин.

**2.** *күсм.* Эш-хәрәкәткә кәртә ҡуйған ҡаршылыҡ. *Тотҡарлыҡ яһау.* ■ *Ғилемде табырға тотҡарлыҡ булған нәмә — ялҡаулыҡ менән тәртипһеҙ барыштыр.* М. Ғафури.

**ТОТҠАРЛЫҠЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **тотҡарлыҡлау.**

**ТОТҠАРЛЫҠЛАУ** *к.* Тотҡарлыҡ һалып, эш-хәрәкәтте күпмелер ваҡытҡа тотоу; тотҡарлау. *Эште тотҡарлыҡлау.*

**ТОТҠАРЛЫҠҺЫҘ** *с.* Тотҡарлыҡ булмаған; ҡаршылыҡһыҙ. *Тотҡарлыҡһыҙ эш.* // *Тотҡарлыҡһыҙ эшләү.* ■ *Депутатҡа үҙ хоҡуҡтарын һәм бурыстарын тотҡарлыҡһыҙ һәм эффектлы тормошҡа ашырыу өсөн шарттар тәьмин ителә.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ТОТҠАРҺЫҘ** *с. ҡар.* **тотҡарлыҡһыҙ.**

**ТОТҠАСА** *и. диал.* Бәләкәй тотҡа. *Самауыр тотҡасаһы.*

**ТОТҠАҺЫҘ** *с.* **1.** Тотҡаһы булмаған, тотҡаһы юҡ. *Тотҡаһыҙ ишек.*

**2.** *күсм. диал. ҡар.* **тотанаҡһыҙ.** *Тотҡаһыҙ кеше.*

**ТОТҠОЛАУ** *к.* Ҡабат-ҡабат йәки төрлө ерҙән тотоу. *Тотҡолап ҡарау.*

**ТОТҠОН** *и.* **1.** Һаҡ аҫтындағы ирекһеҙ хәл. *Тотҡондағы кеше. Тотҡонға ҡалыу.* ■ *Урал батыр тарафынан тотҡондан ҡотҡарылған ҡыҙ уның янына үлгәс тә килә.* К. Мәргән. *Бикгимер уларҙы ирекҡә сығара. Тотҡондағы хеҙмәтселәр быға шатлана* (Әкиәттән).

**2.** Һаҡ аҫтындағы ирекһеҙ кеше. *Тотҡон булыу. Тотҡон итеү. Политик тотҡон.* // *Тотҡон кеше.* ■ *Төрмәлә күптән ултырған кеше үҙен тыныс тота. Хисмәтулла кеүек яңыраҡ бикләнгән йәш тотҡондар ғына уфтана.* Я. Хамматов. *[Айһылыу ҡыҙҙар хаҡында:] Еҙҙәй һары йөҙҙәре, моңһоу ҡарай күҙҙәре. Минең кеүек урланған тотҡон икән үҙҙәре.* С. Мифтахов. *Тотҡон ҡоштай башҡортҡа әҙер ирек бармы ни?* Салауат Юлаев.

**ТОТҠОНЛОҠ** *и.* Тотҡонда булған хәл. *Тотҡонлоҡта йәшәү. Тотҡонлоҡта тотоу. Тотҡонлоҡтан ҡотолоу. Тотҡонлоҡта ятыу.* ■ *Ҡарлуғас менән Сәсән ауыр тотҡонлоҡта йәшәүҙәрен аңлатыу өсөн үҙҙәрен ҡанаттары ҡайырылған ҡош менән сағыштыра.* М. Ғималова. *[Һәүбән хаҡында Айһылыу:] Ана беҙҙе шул егет тотҡонлоҡтан ҡотҡарҙы, Аҡбуҙатҡа мендереп, ҡул сигенә сығарҙы.* С. Мифтахов.

**ТОТҠОС** *и.* Ниҙелер тота, тотоп ала торған ҡорал, ҡорамал. *Таба тотҡос. Комбайндарҙың һәр берешендә ашлыҡ тотҡос бар.*

**ТОТЛОҒОУ** (тотлоҡ*ә*) *к.* **1.** Тел боҙолоп, һүҙҙе әйтә алмай туҡтау. *Тотлоғоп һөйләү. Тотлоғоп уҡыу. Тотлоҡмай һөйләү. Ҡурҡыштан тотлоға-тотлоға яуап биреү.*

**2.** *диал кар.* **тотолоу** 2.

**ТОТЛОҠМА** *и.* Теле тотлоғоп һөйләгән кеше. *Уны [Вераны] стенаға терәп, атабыҙ, тип тә ҡурҡыталар.. Шул саҡтағы ҡурҡышынан ул тотлоҡма булып ҡала.* С. Сәйетбатталов.

**ТОТМАР** *и. иҫк. кит.* Эстәлек, асыл. *Әҫәрҙең тотмары.*

**ТОТОЛОУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **тотоу** 1, 3—5, 8—13, 17, 18, 20. *Тотолған акса. Айырым тотолоу. Ҡар тотолоу. Тотолған йәнлек.* ■ *Интәшем: — Эй, мин ауылда ҡыяр урлап тотолғанымды һөйләйем әле,— тине.* С. Агиш.

**2.** Икенсе бер күк есеменә йәки уның шәүләһенә ышыҡланыу (Ай, Ҡояшҡа ҡарата). *Ай тотола. Ҡояш тотола.*

● *Айран эскән тотолған, күнәк ялаған тотолған.* Мәҡәл.

**ТОТОНҒОС** *и.* Ҡул менән тотона торған ҡулайлама. *Баҫҡыстың ян-ягына ағастан тотонғостар ҡуйылған.* З. Биишева.

**ТОТОНДОРОУ** *к. йөкм. ҡар.* **тотоноу.** *Эшкә тотондороу.*

**ТОТОНОЛОУ** *к. төш. ҡар.* **тотоноу** 4. *Тотонолған акса. Тотонолған түшәк.*

**ТОТОНОУ** *к.* **1.** Ыҫҡынмаҫлыҡ итеп ҡулды эләктереү; йәбешеү. *Ике ҡуллап тотоноу. Тотоноп ултырыу.* ■ *Сәгиҙә .. Зыяга һыйына биреп, беләгенә тотондо.* М. Тажи.

**2.** Ни ҙә булһа эшләү өсөн ҡулға алыу; йәбешеү. *Ҡоралға тотоноу.* ■ *Ул [Тимер] ниндәй ҙер йыллы һүҙҙәр яҙырға теләп, тағы ҡәләмгә тотондо.* Б. Бикбай.

**3.** *күсм.* Таяныс, ярҙам эҙләп, кемгә йәки нимәгәләр мөрәжәғәт итеү. *[Өйрәнсек] һүҙенә оҫталыҡ, үҙенә олпатлыҡ бирергә тырышып, халыҡ мәҡәленә тотоноп ала.* З. Биишева.

**4.** Эштә, тормошта ҡулланыу, кәрәккә файҙаланыу. *Аҡсаны тотоноу. Балтаны тотоноу. Түшәк, яҫтыҡты тотоноу. Мул тотоноу.*

**5.** Төбәү килештәге исемдән йәки *ырға* формаһындағы ҡылымдан һуң килеп, шулар менән бәйле эш-хәрәкәткә керешеүҙе белдерә. *Ашарға тотоноу. Иларға тотоноу. Уйынға тотоноу. Уҡырға тотоноу. Һөйләргә тотоноу. Эшкә тотоноу.* ■ *Тағы йыйнаулашып, тотондолар ташбаш ауларға.* Ғ. Амантай.

● *Бәрәшән тотонған бәрәкәтте ҡасырған.* Мәҡәл.

**ТОТОНОШОУ** *к.* Үҙ-ара ҡулды ҡулға тотоу. *Тотоношоп барыу. Тотоношоп бейеү.*

**ТОТОРОҠ** *и.* **1.** Ыҫҡындырмай, ауҙармай тотоп торған ныҡлыҡ; тоталҡа. *Өй иҫкергән, торорого бөткән.*

**2.** Тейешле бер сик, самала тотоп торған көс йәки сифат; тотанаҡ. *Бөтөнләй тип әйтерлек торорогон юғалтҡан Врангель партизандарҙың йортон яндырырға, таларға, ғаиләһен ҡулға алырға приказ таратты.* И. Насыри.

**3.** *һөйл.* Бәүелде быуа торған ауырыу. *Бәүел торорого булыу.*

**ТОТОРОҠЛО** *с.* **1.** Бер хәлдә ныҡ тороуға һәләтле. *Торороҡло кәмә.*

**2.** Бер үк сифат, дәрәжәне үҙгәртмәй, оҙаҡ һаҡлауға һәләтле; ныҡлы. *Торороҡло план. Торороҡло урожай. Торороҡло хужалыҡ.* ■ *Халыҡ ҡатнаша, халыҡ аралаша. Ошо этник «ҡаҙанға» һәр төркөм үҙенең культура һәм ижади мираҫын килтерә. Был мираҫтың алдынғы традициялары күпселек тарафынан элеп алына һәм дөйөм төбәктең торороҡло ижад хазинаһына әйләнеп китә.* К. Мәргән.

**3.** Үҙ һүҙендә, вәғәҙәһендә тороусан. *[Һарыбай] торороҡло кеше түгел икән шул: Ҡарабайға әле рәхмәт .. әйтһә лә аҙаҡ уның яҡшылығын онота.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». // *Нисауа, егеттәр, нисауа, торороҡло күренәһегеҙ! — тип маҡтаны беҙҙе Зәмзә апай.* Й. Солтанов.

**ТОТОРОҠЛОҠ** *и.* **1.** Бер хәлдә ныҡ тороуға һәләтлелек. *Кәмәнең торороҡлого.*

2. Бер үк сифат, дәрәжәне үҙгәртмәй, оҙаҡ һаҡлауға һәләтлелек. *Урожайҙың тотороҡлоғо. Хужалыҡтың тотороҡлоғо.* ■ *Көйгә һалыныл, ритм, рифма тотороҡлоғо һаҡланып һөйләнгәндәре «әйтем» тип атала, тиҙәр.* Ғ. Амантай.

**ТОТОРОҠЛОЛОҠ** *и. ҡар.* **тотороҡлоҡ.**

**ТОТОРОҠҺОҘ** *с.* **1.** Бер үк хәлдә ныҡ тотоуға һәләтһеҙ. *Тотороҡһоҙ кәмә.*

2. Бер үк сифат, дәрәжәне үҙгәртмәй, оҙаҡ һаҡлауға һәләтһеҙ. *Тотороҡһоҙ валюта. Тотороҡһоҙ урожай.*

3. Һүҙен, вәғәҙәһен боҙоусан; инабатһыҙ.

**ТОТОРОҠҺОҘЛОҠ** *и.* **1.** Бер хәлдә ныҡ тороуға һәләтһеҙлек. *Кәмәнең тотороҡһоҙлоғо.*

2. Бер үк сифат, дәрәжәне үҙгәртмәй, оҙаҡ һаҡлауға һәләтһеҙлек.

**ТОТОУ** *ҡ.* **1.** Бармаҡ йәки ус менән ҡыҫыу; ҡулға алыу. *Бөрә тотоу. Ҡулдан тотоу. Ҡыҫып тотоу. Нығытып тотоу. Тотоп ҡарау. Услап тотоу.* ■ *Инспектор ҡулына папка тотоп, килеп тә етте.* Т. Йәнәби. *Сура, сура, сурамын, түрә түгел, ҡарамын, толпар менеп, ҡорал тотоп, яуға ҡаршы барамын* (Ҡобайырҙан).

2. Ҡулға алып, эш итеү. *Балта тоторға өйрәнеү. Дилбегә тотоу. Мылтыҡ тота белеү. Руль тотоу. Теҙген тотоу.* / *күсм.* Етәкселек, бойондороҡ аҫтына алыу. *Власть тотоу.* ■ *Хужа өйҙә юҡ саҡта [управляющий] бөтәһен үҙ ҡулында ҡалтыратып тота.* Һ. Дәүләтшина.

3. Ҡасҡан, иркендә йөрөгән ерҙән ҡулға эләктереү. *Баҫтырып тотоу. Тотоп алыу. Тотоп бикләү. Тотоп алып китеү.* ■ *Ҡайтып килгәндә бер урында тотһалар ҙа беҙ унан да ҡотолдоҡ.* Т. Йәнәби. *[Исправник:] Был кеше үлтереүсене нисек тотҡандар, ҡайҙа булған?* Т. Хәйбуллин. *Ҡуҙыйкүрпәс түгыҙ йыл тыу йөрөгән бейәне һәтигәнсә тотоп, һыбайланып алды, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

4. Һунар итеп аулап, ҡулға эләктереү. *Аулап тотоу. Ҡош тотоу. Ҡуян тотоу. Тотоп ашау.* ■ *Йәйен бабай балыҡ тотҡан, әбей емеш-еләк йыйған* (Әкиәттән).

5. Насар эштә тап килтереп, фаш итеү. *Хәтмулла ҡыҙы Зәйнәпте Вәли бай малайы менән тоттолар.* Н. Ҡәрип.

6. *күсм.* Насар хәлгә дусар итеү. *Кеше хаҡы тота.* ■ *[Бүнәтәй:] Гонаһтан ҡурҡ, Кәлимулла, бер гәйепһеҙ балаһын ҡулға алған өсөн ауырыу Агинәйҙең аһы тотор.* И. Ғиззәтуллин.

7. *күсм.* Ҡапыл йәбешеп, ныҡ ауырытыу. *Биҙгәк тота. Быума тота. Йөрәге тота. Тулғаҡ тота. Эстән тота.* ■ *Фәриҙә еңгә .. эшкә лә сыҡҡаны юҡ, ҡулына эш тотһа, йәнәһе, өйәнәге тота.* Ҡ. Ибәтуллин.

8. Осоп, ырғып барған ерҙән ҡулға эләктереү. *Бәргән таяҡты тотоу. Тупты тотоу.* / Китер, бөтөр ерҙән туҡтатыу. *Ерҙе тырматып, дым тотоу. Ҡар тотоу.* / *күсм.* Ниҙеңдер бер яғын, сифат, мәғәнәһен эләктереү. *Мәсьәләнең мөһим яғын тотоу. Төп фекерҙе тотоу. Оҡшашлыҡты тотоу. Һүҙҙе тотоу.* / *күсм.* Радио тулҡындарын һауанан табыу. *Кәрәкле тулҡынды тотоу. Өфө радио станцияһын тотоу.*

9. Ыҫҡындырмай, төшөрмәй, бер хәлдә һаҡлау. *Йөктө ырғаҡ тота. Ҡыйыҡты бағана тота.* ■ *Ағас ботағына эләккән пинжәгем дә мине тота алманы.* Б. Ишемғол. / Үтә төшөрмәй, үткәрмәй туҡтатыу. *Кейем йылыны тота. Өй түбәһе бер тамсы һыу тотмай.* / Ирек бирмәй, юл ҡуймай туҡтатыу. *Үҙеңде тотоп ҡалыу.* ■ *Күңел һыҙлай, һыҙлай, һыҙлауыҡ бар ҡара көстәр мине тотҡанға.* Ш. Бабич. / *күсм.* Терәк, таяныс булып һаҡлау. *Уны йәшлек еле генә тота инде, юҡһа, .. сырайында төптө ҡан эҫәре юҡ.* Б. Бикбай. *Донъяны бит аҡыл, йөрәк тота, дәрәжәләр тотмай донъяны.* Н. Нәжми.

10. Ниндәйҙер бер хәлгә ҡуйын, үҙгәртмәй һаҡлау. *Башты саңҡайта тотоу. Ҡулды юғары тотоу. Кәүҙәне тура тотоу.* ■ *Нисек атлап йөрөргә, буйҙы-һынды нисек торорға тиһәң — быныһын Маһикамал үҙе белә.* Ш. Насыров. / *күсм.* Ниндәйҙер ҡылыҡ, ҡиәфәт һ. б. алып, шуны һаҡлау. *Үҙеңде батыр тотоу. Ипле тотоу. Үҙеңде тота белеү.* ■ *Был кеше алдында мин үҙемде .. иркенерәк тота инем.* С. Агиш. *БАССР гражданарына выждан ирке, йәгни теләгән бер динде тотоу йәки бер ниндәй динде лә тотмау .. хоҡуғы гарантиялана.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. / *күсм.* Ниндәйҙер кимәл, дәрәжәлә һаҡлау. *Дәрәжәне тотоу. Илдең данын тотоу. Байраҡтың намыҫын һәм мәңге һүнмәҫ данын юғары тотоу.*

11. Ниҙеңдер тәьҫиренә ҡуйыу. *Быуға тотоу. Елгә тотоу. Утҡа тотоу.* ■ *Ике балтаны яҡшылап сарға тоттолар.* Ф. Иҫәнғолов. / Хәрби ҡорал тәьҫиренә дусар итеү. *Бомбаға тотоу.*

12. Ситкә сығармай, йомоп һаҡлау. *Иҫтә тотоу. Эстә тотоу. Сер тотоу.* ■ *Диңгеҙ тотмай икән юҡ-барҙы — ярға атҡан бөтә сүп-сарҙы.* М. Кәрим. / Ҡулдан ебәрмәй һаҡлау. *Бирмәй тотоу. Тотоп тороу.* ■ *Гостиницала бер нисә номерҙы киләсәк делегаттар өсөн тоталар.* / Билдәле бер урындан йәки үҙ янынан ебәрмәй туҡтатыу. *Оҙаҡ тотоу. Янда тотоу.* ■ *Яңы килгән һалдаттарҙы бер-ике тәүлектән ары тотмайҙар.* Д. Юлтый. / Кем йәки ниҙеңдер барышын, ыңғайын туҡтатыу. *Эште тотоу.* ■ *Бөтә ауылдарҙы йөрөп сыға алманыҡ, Ырғыҙ ташҡыны тотто.* Һ. Дәүләтшина. / *күсм.* Түләргә, бирергә тейеш нәмәнән бер өлөш өҙөү. *Тотоп алып ҡалыу. Ашау иҫәбенә эш хаҡынан тотоу.*

13. Үҙ ҡулында һаҡлау. *Әлеге балдаҡты: «Быңа, туташ: насар булһа ла, минең төҫөм итеп тоторһоң, үҙем яһағайным»,— тип тәҡдим иттем.* Т. Йәнәби. / Ниндәйҙер бер хәлдә йәки урында күпмелер ваҡыт ҡалдырыу. *Кешене төрмәлә тотоу. Аҡсаны кассала тотоу. Тәҙрәне асыҡ тотоу. Эҫе һыуҙа тотоу. Ябып тотоу.*

14. Эстә, күңелдә йөрөтөү. *Асыу тотоу. Ғишыҡ тотоу. Иҫәп тотоу. Ниәт тотоу. Уй тотоу. Үпкә тотоу.* ■ *Ишкилде ҡарт — ҡарттың шундайы: юҡҡа уның эсе бошманы, тура һүҙгә кенә тотманы.* С. Кулибай.

15. Үҙ ҡулында аҫрау йәки биләү. *Байлыҡ тотоу. Ер тотоу. Ҡош-ҡорт тотоу. Мал тотоу. Эт тотоу.* ■ *[Шафиҡ:] Үҙеңде лә, балаларыңды ла өф итеп кенә тотормон.* Я. Хамматов. / Үҙ янында, үҙ ҡарамағында булдырыу. *Өйҙәш тотоу. Ялсы тотоу.* ■ *Йәй буйы нисәмә малай тотоп эшләттеләр.* Ғ. Дәүләтшин. / *күсм.* Ниндәйҙер

сифат, мәғәнә биләү. *Әһәмиәт тотоу.* ■ *Владимир Ильич Лениндың Өфөлә булыуы уның революцион эшселәр партияһы төҙөү өсөн алып барған көрәшендә ҙур урын тота.* «Совет Башҡортостаны», 1964, 23 ғинуар.

**16.** Билдәле бер яҡҡа йүнәлеш алыу, хәрәкәтте йүнәлтеү. *Уңға тотоу. Һулға тотоу.* **Юл тотоу** *кар.* **юл**[1] 4. / *күсм.* Ниндәйҙер рәүеш, йүнәлештә башҡарыу. *Һүҙҙе ҡыҫҡа тотоу. Эште ҡыҙыу тотоу. Ҡоро тотоу. Тиҙ тотоу.* ■ *Бында оҙаҡ һөйләшеп ултырырға ярамай. Эште ҡыҫҡа торорға кәрәк.* Ғ. Дәүләтшин.

**17.** *күсм.* Бер йүнәлеш, ҡағиҙә итеп, иғтибарға, күңелгә алыу. *Ата һүҙен тотоу. Законды тотоу. Кәңәште тотоу. Әйткәнде тотоу.* / Эш, тормош йүнәлеше итеп алыу. *Дин тотоу. Эшселәр мәнфәғәтен тотоу.*

**18.** *күсм.* Буйлатып йәки сит-ситтән уратып һуҙыу. *Кәртә тотоу. Ҡойма тотоу. Ситенә ҡыҙыл соға тотҡан елән.*

**19.** *күсм.* Берәй эш-хәрәкәткә ҡаршы яуап рәүешендә эш итеү. *Көрәш тотоу. Майҙан тотоу. Фронт тотоу. Ҡурғау тотоу.* / Ҡара-ҡаршы яҡ араһында эш итеү. *Бәйләнеш тотоу. Элемтә тотоу.*

**20.** *күсм.* Кәрәк-яраҡ өсөн файҙаланыу; тотоноу. *Аҡса тотоу.* ■ *Һуңғы тиндәрҙе тотоп, кинолһына ла барҙыҡ, үҙебеҙҙә бер төрлө лә ярлылыҡ һиҙмәнек.* С. Агиш. *Өҫтәл өҫтө һыуһылыу әбейҙең, улым ҡайтҡас ҡына һыйға тотор өсөн тип, һаҡлап ҡуйған ҡыҙыл сыбар ашъяулығы менән ябылған.* Ғ. Дәүләтшин.

**21.** Ҡатмарлы мәғәнә биргән ҡушар ҡылымдарҙың беренсе йәки икенсе компоненты булып килә. *Тотоп биреү. Тотоп һелкеү. Тыйып тотоу. Һаҡлап тотоу.* ■ *Нык ҡына бәйләп тотайым елбәҙәк күңелемде.* Ш. Бабич.

**22.** *-п* формаһында йәки зат формаһында **ла** киҫәксәһе менән төп ҡылымға ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында эш-хәрәкәттең ҡапыл, киҫкен башҡарылғанын белдерә. *Тотоп башлау. Тотоп маҡтау. Тотор ҙа эшкә ҡушыр. Тот та кейәүгә бир. Тот та кил.* ■ *[Закир:] Отряд төнгө ялға туҡтағас, тоттом да өйгә ҡарай һыҙҙым.* З. Биишева. *Их, гәфү үтенер инем, тотоп һүкһәм нахаҡҡа.* М. Кәрим.

♦ **Ене тотоу** *кар.* **ен**[1].

● *Бер олонокон, бер кесенекен тот.* Әйтем. *Этеңде бауҙа тот, телеңде бәйҙә тот.* Әйтем.

**ТОТОШ**[1] *и.* Билдәле бер холоҡ, ҡылыҡ рәүеше, үҙ-үҙеңде тотоу рәүеше. *[Мәҙинә менән Ямалдың] донъяға ҡараштары; үҙ-үҙен тотоштары үҙгә булһа ла көн һайын тиерлек бергә, шатлыҡ, ҡайғылары бөткәнсә уртаҡ ине.* Ф. Мансуров.

**ТОТОШ**[2] *р.* **1.** Бөтә булған өлөш, берәмектәр күләмендә; тулыһынса. *Тотош йыуыу. Тотош ҡуҙғалыу. Тотош ҡырҡыу.* ■ *Күмер тотош һүрелеп, буш көл генә булып ҡала.* Б. Бикбай. *Тотош колхозлашыу нигеҙендә һуңғы синыф бөтөрөлә.* Ғ. Амантай.

**2.** Бүленмәгән тулы күләмдә; тулыһынса. *Тотош актарыу. Тотош биләү. Тотош йәйелеү. Тотош ҡалтырау. Тотош сәскәгә күмелеү. Тотош ятлау.* ■ *[Яланбикә:] Ике итәк тотоп, тығыҙ төрлө төрлөк баҫып, буйын ҡыҫҡаса тотош итеп теғәйек.* Һ. Дәүләтшина. *Йәшел үләнле тау битләүҙәрен тотош ҡаплап ятҡан мал-тыуарҙың иҫәбе-хисабы булмаған.* Н. Иҙелбай.

**3.** Бөтә булмыш күләмендә; тулыһынса. *Тотош аҡ. Тотош быяла.* ■ *[Ҡыҙрас:] Мин бит тотош насар уҡымайым.* З. Биишева. *Һарайҙың тирә-яғы тотош ҡара ер.* М. Кәрим. **Тотошо менән** тулыһынса. *Тотошо менән йәшеллеккә күмелеп ултырған ауыл.*

♦ **Тотош алғанда** шул уҡ **дөйөм алғанда** (*кар.* **дөйөм**).

**ТОТОШ**[3] *билд. а.* Ниҙеңдер өлөш һәм берәмектәрен тулыһынса эсенә алғанды белдерә; бөтә. *Тотош ауыл. Тотош халыҡ.* ■ *Тотош завод бергә йыйылған.* В. Нафиков. / Ниҙелер бүлмәй, тулы күләмдә эсенә алғанды белдерә; бөтә. *Тотош бер сәғәт ваҡыт. Тотош кәүҙә.* ■ *Тотош офоҡ алһыуланып яҡтыра башланы.* Б. Бикбай. *[Хәмәй:] Дошмандар тотош яу булып беҙҙең өҫкә таба ябырылды.* М. Тажи.

**ТОТОШЛАЙ** *р.* **1.** Бүленмәгән тулы күләмдә; тулыһынса, тотош. *[Зинуна — Азаматовка:] Бында [баҫыуҙа] быйыл бер аҙ кукуруз һәм картуф сәселергә тейеш. Алдағы йылда инде тотошлай кукуруз сәсергә мөмкин буласаҡ.* Ә. Вәли. *Күсәрбайҙың өҫтөнә һандыҡтай таш емерелеп төштө лә уны тотошлай ҡаплап ҡуйҙы.* Т. Хәйбуллин. *Күлуртлар батыр яҡындағы бер күлде тотошлай уртлап алған* (Әкиәттән). **Тотошлайы менән** тулыһынса. *Тотошлайы менән биреү.*

**2.** Бөтә булмыш күләмендә; тулыһынса, тотош[2]. *Хәҙер уға [һөнәрсегә] тамаҡ, өҫ-баш хаҡында уйламай: йәне-йөрәге һөйгән эшкә тотошлай бирелергә мөмкин.* З. Биишева.

**ТОТОШЛАЙҒА** *р. кар.* **тотошлай**.

**ТОТОШОУ** *к.* **1.** *урт. кар.* **тотоу** 1—5, 8, 11, 14, 18, 19. *Балыҡ тотошоу. Шыбаға тотошоу.*

**2.** Бер-береңде ҡулдан тотоу; тотоношоу. *Тотошоп барыу. Ҡул тотошоп, ант биреү.*

**ТОТОШТАН** *р.* Бөтә күләмдә; тотош[2]. *Шаҡмаҡлап һуғылған ҙур ашъяулыҡ тотоштан йәйелгән кейеҙҙең уртаһына төшәлгән.* Т. Хәйбуллин.

**ТОТТОРОУ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **тотоу** 1. *Ишекте асыҡ тоттороу. Дилбегә тоттороу. Ҡулға тоттороу.* ■ *Атаһы Көмөшбайға йөҙ һум аҡса тотторған* (Әкиәттән).

**2.** Торорға мөмкинлек биреү, ҡулға бирелеү. *Теге аттар тоттороу түгел, егетте яҡын да ебәрмәгән* (Әкиәттән).

**3.** Торорға рөхсәт биреү. *Йылғанан балыҡ тоттороу. Урмандан ҡош тоттороу.*

**4.** Торорға, ҡулға алырға ярҙам биреү. *Уғрыны тоттороу.* ■ *Ҡыҙыл партизан Айбулат .. ҡатыны Гөлйөҙөмдө эҙләп тыуған өйөнә килә. Ләкин бай ҡыҙы Хайәт уны бандиттарға тоттора.* М. Минһажетдинов.

**5.** Торорға, фаш итергә мөмкинлек биреү. *Сабир ышанып етмәйенсә, Рәшиткә теклән ҡарап торһа ла, Рәшит үҙен тотторманы, алдашыуын һиҙҙермәйенсә, үтә етди булып ҡала бирҙе.* Д. Исламов.

● *Төлкө ҡыуҙым — тотторманы, ҡуян ҡыуҙым еткермәне.* Әйтем.

**ТОҺАУЫЛЛАУ** *к. диал.* Аңдыу.

**ТОШ**[1] *и.* **1.** Сикле бәләкәй урын. // *Тош-тош ер.* ■ *Урта тоштараҡ кемдер нәҙек тауыш менән йыр башланы.* Я. Хамматов. *Ошо тоштан баҫыуҙарҙың сикһеҙ сиге күренә.* С. Кулибай.

**2.** Билдәле бер ваҡыт арауығы; мәл. *[Шафиҡ:] Мин өс көн тошонда туйҙым, Сафиуллаһынан да, Фәррәхенән дә .. туйҙым.* С. Агиш.

♦ **Тош булыу** тап булыу, осрау. **Тош итеү** тап итеү, осратыу. **Тош килеү** тап килеү, дөрөҫкә сығыу. *Боронғолар һүҙе тош килде. Абайлаһаң, егеттәр, беҙҙә бәйлек ҡалманы* (Ҡобайырҙан).

**ТОШ**[2] *и. иҫк.* Тиңдәш.

**ТОШАЛЛАУ** *ҡ. диал.* Тоҫмаллау. *Тошаллап барыу.*

**ТОШОҒОУ** (тошоҡ*ғ*) *ҡ. иҫк.* Тап булыу, осрау.

● *Яманға тошоҡма, тошоҡһаң, бошоҡма.* Әйтем.

**ТОЯҠ** *и.* **1.** Мал аяғының осондағы ҡаты өлөшө. *Кәзә тояғы. Һыйыр тояғы. Ялпаҡ тояҡ. Тояҡ тауышы.* ■ *Аттар ҡыштыр-ҡыштыр бесән ашай. Ҡайһылары бышҡыра, ҡайһылары тояҡтары менән ергә һуғып ала.* С. Агиш. *Ҡаһым түрә менгән һор юрғаҡай, тояҡтары ҡупҡан, баҫа алмай* (Халыҡ йырынан). **Йомро тояҡ** йылҡы тояғына ҡарата. **Йомро тояҡлы мал** йылҡы малы. **Тояҡ йөрәге** ат тояғының аҫтындағы өскөлләнеп торған йомшаҡ ит.

**2.** (*йәки* **сана тояғы**) Сананың табаны менән үрәсәһен тоташтырған ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ағас.

**3.** Ҡатын-ҡыҙ биҙәүестәренең мәрйен теҙеп, осона тәңкә тағып яһаған сәсәге.

**4.** *диал. ҡар.* **тырнаҡ** 6.

**5.** *диал. ҡар.* **аяҡ** 2.

**ТОЯҠЛЫ** *с.* Тояғы булған. *Тояҡлы хайуандар.*

♦ **Айыры** (*йәки* **ҡуш) тояҡлылар** *зоол.* һыйыр, һарыҡ, болан, фил кеүек икегә айырылып торған тояҡтары берҙәй үҫешкән имеҙеүселәр отряды исеме.

**ТӨБӨР** *и. диал.* **1.** Төпһә, төп. *Хәмдиә усаҡта сытырлап янған сағыр төбөрҙәрен төҙәтә.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Түҙлек.

**3.** Иләгәндән ҡалған көнйәлә төбө.

**ТӨБӨ-ТАМЫРЫ: төбө-тамыры менән** бөтөнләй, тотош. *Төбө-тамыры менән юҡ итеү. Төбө-тамыры менән йолҡоу.*

**ТӨБӘК** *и.* **1.** Өс яҡтан һыу, ағас йәки тау менән уратылып, эскә инеп торған урын. *Ҡарт торҙо ла, .. бер төбәккә туҡтап, сисенеп ташлап, сәй ҡуйырға сытыр көйрәтте.* Ғ. Амантай. *Йылҡы ебәрҙем төбәккә* (Халыҡ йырыиан).

**2.** Алыҫтағы бәләкәй бер урын; төпкөл. *Тыуған төбәк.* ■ *Шәжәрәнең бер осо .. ошо төбәккә башлап килеп ултырған Имаш ҡартҡа барып тоташа, ти.* К. Мәргән.

**3.** *тар.* Административ яҡтан сикләнгән билдәле урын; аймаҡ, район. *Төбәк вәкиле. Төбәк газетаһы.* ■ *Курс бөтөрөп ҡайтҡан Талип комсомолды төбәк башҡармаһына эш башҡарыусы итеп ултыртып ҡуйҙылар.* Б. Ишемғол. / Билдәле маҡсаттағы үҙәк. *Бөтә бәләкәй Башҡортостанда ун бер генә агрономлыҡ төбәге булды.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**ТӨБӘКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Йәшәр өсөн билдәле бер урында урынлашыу. *Ауылда төбәкләнеү.*

**ТӨБӘКЛӘШЕҮ** *ҡ.* **1.** Урынлашыу. *Төбәкләшеп алыу.*

**2.** Бер төркөм, бер төбәккә йыйылыу. *Улар [ураҡсылар] һәр кем үҙ өйөрө, үҙ ауыл кешеләре менән төбәкләшеп урынлашҡан.* Һ. Дәүләтшина.

**ТӨБӘЛ** *и. диал.* Тәгәрмәс туғыны бөгә торған стан.

**ТӨБӘЛЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **төбәү** 1. *Алыҫҡа төбәлгән күҙ.*

**2.** Күҙ, ҡарашты туп-тура йүнәлтеү; текәлеү. *Төбәлеп ҡарау.* ■ *Ул [Фәнис] ниндәй төбәккә генә төбәлһә лә, күҙҙәрен айырып ала алмай.* Р. Низамов.

**ТӨБӘҮ**[1] *ҡ.* **1.** Туп-тура йүнәлтеү (күҙ, ҡарашты); текәү. *Төбәп ҡарау. Ҡарашты төбәү.* ■ *Зәлифә .. күҙен алыҫҡа, бик алыҫҡа төбәгән дә тәрән уй эсендә бара.* Ғ. Дәүләтшин. **Күҙ төбәү** шул уҡ **күҙ текәү** (*ҡар.* **күҙ**).

**2.** Туп-тура ғағышлау йәки мөрәжәғәт итеү. *Төбәп әйтеү.* ■ *Хашимов .. дуҫына төбәп: «Быны уҡы, һине маҡтағандар»,— тине лә ҡағыҙҙы бирҙе.* Б. Бикбай.

**3.** Кемгә йәки ҡайҙалыр тура йүнәлеш алыу; хәрәкәтте, маҡсатты йүнәлтеү. *[Маҡтымһылыу:] Атама төбәп килһәң, сәләм бирер инең һин; йәйләүгә төбәп килһәң, оран һалыр инең һин.* «Ҡара юрға».

**ТӨБӘҮ**[2]: **төбәү килеш** *грам.* «кемгә», «нимәгә», һорауына яуап булған килеш.

**ТӨБӘШЕҮ** *ҡ.* **1.** *урт. ҡар.* **төбәү**[1] 1. *Күҙ төбәшеү.*

**2.** *диал.* Төпсөшөү. *Төбәшеп һорау.*

**ТӨГӘЛ** *с. диал.* Теүәл.

**ТӨГӘНЕҮ** *ҡ. иҫк.* Һан, күләм йәһәтенән юҡҡа сығыу; бөтөү. *Бер әсәнән биш инек, .. һис төгәнмәҫ кеше инек* (Ҡобайырҙан).

**ТӨҘ**[1] *с.* **1.** Тегеләй-былай бөгөлмәгән тигеҙ йүнәлешле; кәкре йәки ҡыйыш түгел; тура. *Төҙ бармаҡ. Төҙ кәүҙә. Төҙ ағас. Төҙ юл. Шәм кеүек төҙ шыршы.* // *Төҙ баҫыу. Төҙ булып үҫеү.* ■ *Мин кәүҙәне төҙ тоторға, аяҡтарҙы .. өҙөп баҫырға тырыштым.* Д. Юлтый. *Ҡырҙа үҫкән төҙ ҡурай кемгә моңдаш булмаған?* (Ҡобайырҙан). **Төҙгә ҡатыу** кәүҙәне төҙ тотоу.

**2.** *күсм.* Дөрөҫлөк, тоғролоҡ менән һуғарылған. *Һиндә юҡ ысын һүҙ менән ап-асыҡ йөҙ, төҙ күңел.* Ш. Бабич.

● *Тотолмаған бур бейҙән дә төҙ булыр.* Әйтем.

**ТӨҘ**[2] *и. диал.* Ялан, ҡыр. *Төҙҙә йөрөү. Япан төҙ. Төҙгә сығыу.*

**ТӨҘҘӨРӨҮ** *ҡ. ҡар.* **төҙөтөү**.

**ТӨҘЛӘҮ** *ҡ. ҡар.* **төҙәү**.

**ТӨҘӨК** *с.* **1.** Төҙөлөшө, булмышы боҙолмаған, эшкә яраҡлы. *Төҙөк машина. Төҙөк сәғәт.* // *Ҡорамалды төҙөк тотоу.* ■ *— Бынау патефон төҙөкмө? — Төҙөк, төҙөк. Ун ике пластинкаһы менән.* Б. Бикбай.

**2.** Иҫкереп, туҙып, эшлектән сыҡмаған; бөтә ере бөтөн, етеш. *Төҙөк ауыл. Төҙөк донъя. Төҙөк кейем. Төҙөк юл.* ■ *Крещатик ҡайтанан тыуған һәм йорттар төҙөк бында.* Р. Ниғмәти.

**3.** Бөтә ере килешле. *Зөләйхә туташ уйлаған-*

*дан да һылыуырак, төҙөгөрәк булып сыкты.* Т. Йәнәби.

**4.** *күсм.* Яҡшы ниәт менән һуғарылған. *«Вау» [выждан] төҙөк ул, «нон» [нәпсе] боҙок, һуң тиҫкәре.* Ш. Бабич.

**ТӨҘӨКЛӨК** *и.* **1.** Төҙөлөшө боҙолмаған, эшкә яраҡлы хәл. *Моторҙың төҙөклөгөн тикшереү.* ■ *Дивизияның команда пунктынан бәйләнештең төҙөклөгө һуңғы тапкыр тикшерелде.* В. Ғирфанов.

**2.** Иҫкереп, туҙып, эшлектән сыҡмаған хәл, бөтә ере бөтөн, етеш хәл. *Ырымбур беҙҙе үҙенең төҙөклөгө һәм таҙалығы менән таңға калдырҙы.* К. Мәргән.

**3.** Бөтә яҡтан килешле хәл. *Әҫәрҙә төп урынды алып торған Ташбулат яҙмышы сюжетка бер ни тиклем төҙөклөк, бөтөнлөк бирә.* Ғ. Әбсәләмова.

**ТӨҘӨКЛӘНДЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **төҙөкләндереү.**

**ТӨҘӨКЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Бөтә ерен бөтөн, етеш, төҙөк хәлгә килтереү. *Ауылды төҙөкләндереү. Юлдарҙы төҙөкләндереү.*

**ТӨҘӨКЛӘНЕҮ** *к.* Төҙөк, бөтөн, етеш хәлгә килеү. *Ауылдар һуңғы йылдарҙа бик нык төҙөкләнде.*

**ТӨҘӨЛӨҮ** *к. төш. кар.* **төҙөү** [1]. *Йорт төҙөлә. Исемлек төҙөлә. Комиссия төҙөлә. План төҙөлә. Дөрөҫ төҙөлгән сәскә.* ■ *Ошо урында шаулап торған кала төҙөлөр.* Х. Кунаҡбай.

**ТӨҘӨЛӨШ** *и.* **1.** Төрлө бина, королма төҙөү эше. *Торлаҡ йорттар төҙөлөшө. Төҙөлөш майҙаны. Төҙөлөш планы. Төҙөлөш идаралығы. Төҙөлөш ойошмаһы. Төҙөлөштә эшләү.* ■ *Төҙөлөш кыҙыу бара. Өйҙәр куберәк самандан эшләнә.* К. Мәргән. / Шул эш барған урын. *Белләм, ул [Сәйҙел] кай вакыт, кәрәк булһа, төҙөлөштә лә куна торғайны.* Ғ. Сәләм.

**2.** Ниҙелер ойоштороу эше. *Колхоз төҙөлөшө.* / Эске бәйләнеш һәм ойошторолоу системаһы; королош. *Хужалык төҙөлөшө. Дәүләт төҙөлөшө.*

**3.** Өлөш-өлөштәрҙең эске бәйләнеш һәм ойошторолошо. *Молекуланың төҙөлөшө. Шиғыр төҙөлөшө.* ■ *Ерҙең төҙөлөшөн тикшереү әле яңы башлана.* Д. Бураҡаев. / Тышҡы королош. *Уның кәүҙә төҙөлөшө нескә һәм килешле.* Д. Юлтый.

**ТӨҘӨТӨҮ** *к. йөкм. кар.* **төҙөү** [1]. *Йорт төҙөтөү.*

**ТӨҘӨҮ** [1] *к.* **1.** Төрлө бина, королма эшләү. *Йорт төҙөү. Күпер төҙөү. Тимер юл төҙөү.* / Өлөш-өлөштән йыйып яһау. *Карап төҙөү. Турбина төҙөү.* ■ *Бөтә донъя йәшен берләштереп, ленинсылар төҙөнө паровоз.* Ғ. Амантай. / *күсм.* Тейешле рәүешкә, үлсәмгә килтереп һыҙыу. *Өсмөйөш төҙөү. Ромб төҙөү.*

**2.** Эшләп, ойоштороп, ғәмәлгә килтереү. *Беҙ яр буйында үҙебеҙгә кыуыш корҙок, .. хужалык төҙөй башланыҡ.* Д. Юлтый. / Төркөмгә берләштереп, ойоштороу. *Ғәскәр төҙөү. Колхоз төҙөү. Ойошма төҙөү. Хөкүмәт төҙөү.* ■ *Ауылда ярлылар комитеты төҙөп, ас балаларға столовой астылар.* М. Тажи. / Берәмләп, эҙләп йыйып, ойоштороу. *Библиотека төҙөү. Музей төҙөү.*

**3.** Өлөш-өлөш теҙеп, берләштереп, бер бөтөн нәмә яһау. *Вагондарҙан состав төҙөү. Тигеҙләмә төҙөү. Һөйләм төҙөү.* / Төрлө мәғлүмәтте йыйып, берләштереп, бер нәмә яҙыу. *Акт төҙөү. Дәреслек төҙөү. Исемлек төҙөү. Эш планы төҙөү. Һүҙлек төҙөү.* / Ике аралағы рәсми мөнәсәбәтте билдәләгән ҡағыҙ яҙыу. *Договор төҙөү. Союз төҙөү.*

**ТӨҘӨҮ** [2] *с.* Бөтә ере килешле, күрер күҙгә матур; төҙөк, ҡупшы. *Төҙөү кала. Өҫ-башы төҙөү.* ■ *Кисәгә барыу барыу ҙа, унда арыу кейенгән матур кыҙҙар, төҙөү егеттәр килә торғандыр, тип уйлайһың бит. Т. Йәнәби. // Исем ауылы катындарынан төҙөү кейенгән кеше булмай торғайны.* З. Биишева.

**ТӨҘӨҮСЕ** *и.* **1.** Бина, королмалар төҙөгән кеше. *Төҙөүселәр бригадаһы. Төҙөүсе булыу.*

**2.** Төрлө мәғлүмәтте йыйып, берләштереп, бер нәмә яҙыусы. *Дәреслектең төҙөүсеһе. Йыйынтыҡтың төҙөүсеһе.*

**ТӨҘӨШӨҮ** *к. урт. кар.* **төҙөү** [1]. *Договор төҙөшөү. Йорт төҙөшөү.*

**ТӨҘӘГӘЙ** *с. диал. кар.* **һоноҡ** 1. *Төҙәгәй салғы. Төҙәгәй урак.*

**ТӨҘӘЙЕҮ** *к.* Төҙ, тура хәлгә килеү; турайыу. *Ситәнле кырандаста кырын яткан .. кеше төҙәйеп ултырҙы.* Р. Ниғмәти.

**ТӨҘӘЙТЕҮ** *к.* Төҙ, тура хәлгә килтереү. *Кәүҙәне төҙәйтеү. Тимерсыбыкты төҙәйтеү.* ■ *[Айнурҙың] уйы бағананы төҙәйтеп ултыртып, ... коймаларҙы үҙ урынына рәтләп һалып куйыу ине. Теге бағананы төҙәйтеү өсөн сак кына эткәйне, бөтөнләй серегән икән, төбөнән өҙөлдө лә сыкты.* Н. Мусин.

**ТӨҘӘЙТЕШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **төҙәйтеү.**

**ТӨҘӘЙТТЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **төҙәйтеү.**

**ТӨҘӘЛЕҮ** *к.* **1.** Кәмселек, етешһеҙлектән арынып, яҡшырыу. *Тәртибе төҙәлде.* ■ — *Әллә ошо донъяларҙың төҙәлеп китеүе тураһында бер-бер яңы хәбәр юкмы икән тием дә.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Ауырыуҙан арынып, һауға әйләнеү; шәбәйеү, һауығыу. *Ғәлиәхмәт ағай .. йығылып, кулының быуынын сығарғайны. Дауалап караһа ла, һабантуйға тиклем төҙәлеп етә алманы.* Ф. Рәхимғолова. *[Доктор:] Ярай, улым, ат килгәнсе, әсәйең ял итһен. Иҫ керҙе... Инде төҙәлер.* К. Кинйәбулатова.

**ТӨҘӘЛТЕҮ** *к.* **1.** Кәмселек, етешһеҙлектән арындырыу; төҙәтеү. *Кешенең тәртибен төҙәлтеү.*

**2.** Ауырыуҙан арындырыу; шәбәйтеү, һауыҡтырыу. *Ауырыуҙан төҙәлтеү.*

**ТӨҘӘНЕҮ** *к.* **1.** Өҫ-башты биҙәп, буяп матурлау; яһаныу, биҙәнеү. *Төҙәнеп кунакка килеү.* ■ *Ул [Зөләйхә], мин китәсәк көндө төҙәнеп, яһанып, мине оҙатырға килде.* Т. Йәнәби.

**2.** *күсм.* Матурланыу. *Ер биҙәнде, ер төҙәнде ак кар менән, пак кар менән.* К. Кинйәбулатова.

**ТӨҘӘНЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **төҙәнеү** 1. *Төҙәнешеп йыйылалар өс-дүрт бисә* (Бәйеттән).

**ТӨҘӘТЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **төҙәтеү.** *Төҙәтелгән машина. Төҙәтелгән өй. Етешһеҙлек төҙәтелгән.*

**ТӨҘӘТЕНЕҮ** *к.* **1.** Өҫ-башыңды төҙәтеү. *Ел бәҙәк кыҙ көҙгөгә карап төҙәтенде.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** Үҙ алдыңа ниҙер төҙәтеү. *Ауылдың эшкә яраған кешеләре камыт, дуга, тырма, һабан,*

арбалар тирәһендә бөксәнләй. Шунда төҙәтенә, эшкә әҙерләнәләр. Ғ. Дәүләтшин.

**ТӨҘӘТЕҮ** *к.* **1.** Боҙоҡ ерен эшкә яраҡлы итеү; йүнәтеү. *Ишекте төҙәтеү. Йоҙаҡты төҙәтеү. Машинаны төҙәтеү.* ■ *Кешеләр, төркөмдәргә бүленеп, бер нисә урында юл төҙәтә.* Н. Мусин. *[Каһымбай:] Яңы машина нишләтһәң дә яңы инде ул, түганкай. Яңыны төҙәтеп тораһы юҡ, ултыр ҙа кит.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** Эш-хәрәкәттәге, ҡылыҡтағы кәмселекте бөтөрөү. *Етешһеҙлекте төҙәтеү. Холоҡто төҙәтеү.* ■ *Фәррәх ағай [Саниәгә]: — Әйҙә, булашма шул тиҫкәре менән. Мин инде уны [Сәрбиҙе] үҙ һүгеҙ йыл өгөтләп тә төҙәтә алғаным юҡ.* И. Насыри. *Атаһы улына: «Үҙең эште боҙҙоң, хәҙер үҙең төҙәт», — тигән, ти* (Әкиәттән). / Әйткән һүҙ, яҙған яҙыуҙағы етешһеҙ ерҙе бөтөрөү. *Мәҡәләне төҙәтеү. Хатаны төҙәтеү. Һүҙҙе төҙәтеү.* ■ *Ул [Хәйҙәр] хәбәрҙәрҙе арҡыс-торҡос һыҙғылап, ҡыҫҡартып төҙәтә.* М. Тажи. *Еңгәһен борсомаҫҡа тырышҡан Хисмәтулла: — Әйтмәҫ, — тине лә бер аҙҙан икеләнеберәк төҙәтте: — Нигмәтулла менән Сафуан минең һау ҡалғанды белһә, әҙләйәсәктәр.* Я. Хамматов.

**3.** Тейешле, килешле рәүеш, хәлгә килтереү. *Бүректе төҙәтеп кейеү. Мыйыҡты төҙәтеү. Төҙәтеп тегеү.* ■ *Яурындағы шинелде төҙәтеү һылтауы менән ҡулды Ирочканың биленә ҡуйып, уны үҙемә .. яҡыныраҡ килтерергә тырышам.* Д. Юлтый.

**4.** Етеш, төҙөк хәлгә килтереү. *Өмөтбай .. иң тәүҙә туҙҙырылған донъяһын аҙ-маҙ төҙәтеп, ат-һыйыр алып, крәҫтиән эше менән шөғөлләнмәксе ине.* Ғ. Дәүләтшин.

**5.** Ауырыуҙан арындырыу; шәбәйтеү, һауыҡтырыу. *Дауалап төҙәтеү.* ■ *— Әсәйемде ҡарап, ауырыуынан төҙәтер инек тә Самарға уҡырға китер инек.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Баш төҙәтеү** *ҡар.* **баш** 1.

● *Ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сығарған.* Мәҡәл.

**ТӨҘӘТЕШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **төҙәтеү** 1—4. *Өй төҙәтешеү.*

**ТӨҘӘТМӘ** *и.* Төҙәтеү, яҡшыртыу йәки дөрөҫләү өсөн яһалған үҙгәреш. *Кулъяҙмаға төҙәтмә индереү.* ■ *Һәр көнгө юл беҙҙең ҡарамаҡҡа ҡуйыла. Беҙ уны тикшерәбеҙ, төҙәтмәләр индерәбеҙ, шунан юлға сығабыҙ.* Д. Юлтый.

**ТӨҘӘТТЕРЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **төҙәтеү**. *Машинаны төҙәттереү. Холоҡто төҙәттереү. Хатаны төҙәттереү.*

**ТӨҘӘҮ** *к.* **1.** Сәпкә тура йүнәлтеү (туп, мылтыҡ һ. б. нәмәне); төбәү, тоҫҡау. *Мылтыҡ төҙәү. Төҙәп атыу.* ■ *Таш аҫтынан ябыҡ бер бүре килеп сыҡты, атайым һыҙмаһын да төҙәп өлгөрмәне, теге кәһәрең, ... таш аша һикереп, күҙҙән юғалды.* С. Кулибай. *[Аҡмырҙа] һуңғы уғын төҙәп атып ебәргән, ти* (Әкиәттән).

**2.** Берәй тарафҡа йәки нәмәгә тура йүнәлтеү. *[Ишбулды:] Аттың башын төҙәп ошо яҡҡа, Ҡурташ менән килдек эҙ юрап.* Х. Ғәбитов.

**3.** *күсм.* Ниндәйҙер эшкә, маҡсатҡа йүнәлтеү. *Бөтә көстө дошманға ҡаршы төҙәмәһәк, ул Петроградҡа ярып килеп инәсәк.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**ТӨЗЛӘМПЕЙ** *и. диал.* Һуҡыр шәм.

**ТӨЙГӨЛӘҮ** *к.* Ҡабат-ҡабат һуғып төйөү.

**ТӨЙГӨС** *и.* Төйә торған ҡорал. *Киле төйгөсө. Тоҙ төйгөсө.* ■ *[Ҡатын] ҡулына төйгөс алды, тары төйә башланы.* Ш. Насыров.

**ТӨЙГӨСЛӘҮ** *к.* **1.** Төйөп тығыҙлау. *Төйгөсләп ултырыу. Тупраҡты төйгөсләү.*

**2.** Ҡабат-ҡабат һуғыу; төйөү, төйгөләү. *Камали гөпөлдәтеп күкрәген төйгөсләне.* Р. Ғабдрахманов.

**ТӨЙҘӨРӨҮ** *к. йөкм. ҡар.* **төйөү** [1] 1, 2. *Тары төйҙөрөү.*

**ТӨЙҘӘ** *и.* **1.** Үткер ҡоралдың йөҙөнә ҡаршы, тупаҡ яғы. *Балта төйҙәһе. Бысаҡ төйҙәһе.* ■ *[Бабай] әрселгән ҡарағайға балта төйҙәһе менән һуғып алды.* Ә. Бикчәнтәев. *Ағасты балта төйҙәһе менән һуғып ҡараһалар, ҡупылдап тора, ти* (Әкиәттән). / Сүкеш, кәйлә кеүек нәмәнең тупаҡ яғы. *Сүкеш төйҙәһе.* ■ *— Һуңынан Санька килгән дә: «Һеҙгә эш хаҡы булмаҫ, яҙмайым» тип тора. Шуға асыуым ҡабарып, кәйлә төйҙәһе менән ниңә бирмәнем.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Ҡулдан ата торған ҡорал һабының төп, тупаҡ яғы. *Мотаһар Ғәлин ... танктың люгын асып, автомат төйҙәһе менән водителдең башына ҡундырҙы.* Ә. Ихсан. *Эт өрөп килеп, һалдатҡа ташлана. Һалдат уны-быны ҡарап тормай, мылтыҡ төйҙәһе менән эткә берҙе тондора* (Әкиәттән).

**ТӨЙҘӘК** *и. диал.* **1.** *ҡар.* **төргәк** 1. *Ҡағыҙ төйҙәге.*

**2.** *ҡар.* **төркөм** 1. *Бында шундай матур көҙгө төндә төйҙәк-төйҙәк ҡошҡар үтәләр.* Х. Ғәбитов.

**3.** *ҡар.* **көнйәлә** 1.

**ТӨЙҘӘКЛӘҮ** *к. диал.* **1.** Төргәкләү. *Йөндө төйҙәкләү. Ҡағыҙҙы төйҙәкләү.*

**2.** *күсм. ҡар.* **төйнәү** 3. *Был боланы баҫып ҡалыу кәрәк, көстө бергә ҡушып, төйҙәкләп!* Х. Ғәбитов.

**ТӨЙЛӨГӨҮ** (төйләк*) *к.* Төйөн булып ултырған нәмәгә быуылыу. *Күҙ йәшенә төйлөгөү. Төйлөгөп, йота алмай ултырыу.*

**ТӨЙЛӨГӘН** *и.* Ҡарсығалар ғаиләһенә ҡараған оҙон киң ҡанатлы, киң ҡойроҡло, ҡара күрән төҫлө йыртҡыс ҡош. *Күктә, бик бейектә ҡанаттарын йәйеп, төйлөгән әйләнеп йөрөй.* З. Биишева. *Төйлөгәндәр күренһә, [этәс] ғорурланып ҡысҡыра, себештәрҙе һаҡларға һәр ваҡыт әҙер тора.* К. Кинйәбулатова.

**ТӨЙМӘ** *и.* **1.** Тышҡы кейемде ҡаушырып элә торған тупалсаҡ нәмә; эре һиҙәп. *Ағас төймә. Еҙ төймә.* ■ *Януҙаҡ карт, камзул төймәләрен ысҡындырып, елләнеп алды.* М. Тажи.

**2.** Уртанан тишеп, епкә йәки тимерсыбыҡҡа теҙгән йомро нәмә. *Тиҫбе төймәһе.* ■ *Бригадир Аҙнагол ағай өҫтәл артында шылт та шылт счет төймәләрен тартып, ниҙер иҫәпләп ултыра ине.* Р. Ғабдрахманов.

**3.** Туңәрәк кенә бәләкәй баҫмаҡ (электр сымында); кнопка. *Төймәгә баҫыу.*

**ТӨЙМӘБАШ** *и.* Тар ғына оҙон япраҡлы, ваҡ ҡына кәрзин сәскәле сүп үләне.

**ТӨЙМӘЛӘК** *и.* Бәләкәй генә йомро төймә рәүешендәге нәмә.

**ТӨЙМӘЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Төймә (1 мәғ.) рәүешендә булыу, төймә рәүешенә килеү. *Төймәләнеп тороу.*

**2.** *диал. кар.* **тумалыу** 1.

**ТӨЙМӘСЕК** *и. диал.* Бесәй табаны (*кар.* **бесәй**).

**ТӨЙНӘК** *и. диал.* Төйөнсөк.

**ТӨЙНӘЛЕҮ** *к. төш. кар.* **төйнәү**. *Төйнәлгән төйөн. Төйнәлгән нәмә.*

**ТӨЙНӘҮ** *к.* **1.** Төйөн итеп салыу, төйөн яһау. *Төйнәп бәйләү. Төйөн төйнәү. Еп төйнәү.* ■ *Алпамыша аттың өс ҡылын бергә төйнәп, яндырып ебәрҙе, ти.* «Алпамыша».

**2.** Киң сепрәккә һалып, остарын ҡаушырып бәйләү. *Аҡсаны кульяулыҡҡа төйнәү. Кейемде төйнәп алыу.* ■ *Һалдаттар һаман нәмәләрен йыйып, төйнәп маташа.* Д. Юлтый.

**3.** *күсм.* Берләштереү, беректереү. *Кәңәш төйнәү. Фекер төйнәү.* ■ *Салауат менән килешеп, уны кейәү ҡылырға һүҙҙе төйнәп бөткәндәр.* «Юлай менән Салауат».

♦ **Йоҙроҡ төйнәү** йоҙроҡто йомарлау. *Йоҙроҡтарын төйнәп, Әхмәй килә Сәлим артынан.* Ҡ. Даян. **Ҡойроҡто төйнәү** *кар.* **ҡойроҡ. Эште төйнәү** *кар.* **эш.**

**ТӨЙНӘШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **төйнәү** 1, 2. *Нәмәләрҙе төйнәшеү.*

**ТӨЙӨЛДӨРӨҮ** *к. йөкм. кар.* **төйөлөү** [2]. *Төйөлдөрөр бураҙнала умырып ҡапҡан икмәгең.* М. Кәрим.

**ТӨЙӨЛӨҮ** [1] *к. төш. кар.* **төйөү** [1] 1, 2. *Төйөлгән тары.*

**ТӨЙӨЛӨҮ** [2] *к.* **1.** Төйөн булып ултырыу; тығылыу. *Тамаҡҡа төйөн төйөлә.* ■ *[Зөфәр:] Ҡабаланмай аша, тағы тамағыңа төйөлмәһен.* С. Кулибай. *Шатлыҡтан минең күҙҙәремә йәш төйөлдө.* З. Рафиҡов.

**2.** Төйөн булып ултырған нәмәгә быуылыу; төйләгеү. *Күҙ йәшенә төйөлөү.* ■ *Быны ишеткәс, барлыҡ халыҡ йыйылды, ашап-эскән аштарына төйөлдө.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

♦ **Күҙгә йоҡо төйөлөү** *кар.* **күҙ. Ҡан төйөлөү** *кар.* **ҡан** [1].

**ТӨЙӨЛТӨҮ** *к. йөкм. кар.* **төйөлөү** [2]. *Тамаҡҡа төйөлтә-төйөлтә йотоу.*

**ТӨЙӨН** *и.* **1.** Бауҙы салып алып тартҡандан йәки ике осон ҡуша бәйләгәндән барлыҡҡа килгән тупалсаҡ. *Арҡандың төйөнө. Төйөндө сисеү. Төйөн төйнәү.* ■ *— Өшкөртөп эсергәндәр, ҡыҙыңдың сәсен ҡырҡып алып, ҡырҡ төйөн төйнәп, тупһаңа ла күмгәндәр,— ти [баҡсы].* Һ. Дәүләтшина. / *күсм.* Ауыр, ҡатмарлы эш-хәл. *Күп ваҡыт кеше сисә алмаған төйөндәрҙе тормош үҙе сисеп бирә бит ул.* И. Насыри.

**2.** Организмда бер тигеҙ функция башҡара торған ниндәйҙер күҙәнәктәр тупланған урын; төйөр. *Лимфа төйөнө. Нервы төйөнө.*

**3.** *күсм.* Тынысһыҙлап, борсоп торған ауыр хис, тойғо. *Йөрәкте өйкәгән төйөн.* ■ *Шул минут минең йөрәк тағы ла тулҡынланды, йәберһенгән балалар кеүек, эскә йыйылған бөтә ауыр төйөндәрҙе сиске, йөрәгемдең бөтә ҡиңлеген асып, Мәрйәмгә бөтәһен дә, бөтәһен дә теҙеп, һөйләп бирге килде.* Д. Юлтый. *Атаҡайымдың бер һүҙе төйөн булды йөрәккә* (Халыҡ йырынан).

**4.** *диал.* Төйөнсөк. *Ҡарт лакей ҙа ҙур ике төйөн алып сығып, повозкаға һалды.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Тамаҡҡа төйөн төйөлөү** (*йәки* **килеп тығылыу, килеп ултырыу**) тамаҡты ҡалтыратып, ауырттырып ҡыҫып торған хис, тойғоға ҡарата әйтелә. *[Биктимерҙең] күҙенә йәш эркелде. Тамағына ҡаты бер төйөн килеп тығылды.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТӨЙӨНЛӘНЕҮ** *к.* Төйөн хәлендә булыу, төйөн хәленә килеү. *Төйөнләнеп тороу.*

**ТӨЙӨНЛӘҮ** *к. кар.* **төйнәү.**

**ТӨЙӨНСӨК** *и.* Сепрәккә урап, остарын ҡаушырып бәйләгән нәмә. *Төйөнсөктө сисеү.* ■ *Зөләйхә әбей икмәк, бешкән йоморҡалар һалып, Азатҡа бер төйөнсөк тотторҙо.* З. Биишева. *Төйөнсөктәр ҙә төйнәп ҡуйылды.* Ф. Рәхимғолова.

**ТӨЙӨНСӨКЛӘҮ** *к.* Төйөнсөккә урап бәйләү. *Берҙән-бер көндө ҡасырға булдыҡ. Барлы-юҡлы нәмәне төйөнсөкләп ҡуйҙыҡ та уңайлы ваҡыт көтә башланыҡ.* Ж. Кейекбаев.

**ТӨЙӨР** *и.* **1.** Ғәҙәттә йомшаҡ йәки кәүшәк шыйыҡ нәмәләр араһындағы бергә йәбешеп уҡмашҡан киҫәге. *Ҡан төйөрҙәре. Он төйөрҙәре.* ■ *Он соусында төйөрҙәрҙе булдырмау өсөн ондо тоҙ һалынған һыуҙа болғатырға кәрәк.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1968, № 11.

**2.** Ир-ат затында боғарлаҡтың сурайып сығып торған кимерсәге; күмәгәй. *Аптырауға ҡалған ҡарттың тамаҡ аҫтындағы төйөрө бешкәк кеүек үрле-түбәнле йөрөй башланы.* И. Ғиззәтуллин.

**3.** *күсм.* Тынысһыҙлап, борсоп торған ауыр хис, тойғо. *Күңелгә төйөр булыу.* ■ *Зәйтүнә үҙе лә, яйын килтереп, һөйләп бирә алмай. Шуны һаман күңелендә төйөр итеп һаҡлап йөрөтә.* Ғ. Ибраһимов. *Һүҙ әйтергә бирмәй ҡаты төйөр торған боғазға.* Ш. Бикҡол. *Күкрәгемдә бер төйөр бар — хәсрәт микән, уй микән* (Халыҡ йырынан).

**4.** *күсм.* Сәйнәмле ҡаты аҙыҡ (ит, икмәккә ҡарата). *Эскә төйөр төшмәгәс, тиҙ асыҡтыра.*

**ТӨЙӨРЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Төйөрлө (1 мәғ.) итеү, төйөрлөгә әйләндереү.

**ТӨЙӨРЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Төйөргә (1 мәғ.) әйләнеү, төйөрлө булыу. *Он төйөрләнмәһен өсөн һалғанда болғатып торола.* М. Ғөбәйҙуллин.

**2.** *күсм.* Берәй төрлө итеп тынысһыҙлау, борсоу (хис, тойғоға ҡарата). *Уның [Ямалдың] быға тиклем йөрәгендә төйөрләнеп ятҡан уй, тойғолары, бәбәктәрен тишеп, ҡояш нурына ынтылған бөрөләр кеүек, тышҡа бәреп сыҡҡан.* М. Тажи.

**ТӨЙӨРӨЛДӨРӨҮ** *к.* Төйөр (1 мәғ.) рәүешенә килтереү, төйөр рәүешендә итеү. *[Һалдат] бер ҡул менән траншея ҡаҙып, шул һау ҡулына һеңер төйөрөлдөрөүен .. тасуир итә.* И. Ғиззәтуллин.

**ТӨЙӨРӨЛӨҮ** *к.* Төйөр (1 мәғ.) рәүешенә килеү, төйөр рәүешендә булыу. *Төйөрөлөп торған ҡашы уның [Юламановтың] етди сырайына эшлеклелек һыҙаты өҫтәй.* Н. Мусин.

**ТӨЙӨРӨМ** *с.* **1.** Йомро ғына, үҙе тығыҙ. *[Ғарифтың] аяғы төйөрөмөрәк бер нәмәгә тейеп*

*калғандай булды... Ул көрттө ныгырак актарып ебәргәйне, аяҡ аҫтынан ҙур һары портфель килеп сыҡты.* Б. Бикбай. *Һөрөнтө ер өҫтөндә монар тирбәлде, төйөрөм генә туҙан болото тракторҙы оҙата килде.* Ғ. Вәлиев.

**2.** *күсм.* Ҙур ғына күләмле; тос. *Әхмәҙи ҡыҙын Нух санаһына буш ҡына ултыртып ебәрергә теләмәне, әлбиттә, төйөрөм генә ҡалым ҡуйҙы: бер йылҡы, дурт бот бал, аҡса, биш ҡаҙаҡ сәй, биш-алты бот ит һәм башка ваҡ-төйәк туй сығымдарын әйттe.* Ж. Кейекбаев.

**3.** *күсм.* Сәйнәмле, ҡаты (аҙыҡҡа ҡарата). *Гөлбөҫтан еңгә иртәнсәктән бирле балалары менән бер ҡабым төйөрөм аш йотҡаны юҡ. Шәкәрһеҙ коро сәй генә көндө кис итте.* Ғ. Дәүләтшин. / Бик киҫкен, ҡаты (елгә ҡарата). *Төйөрөм ел иҫә.*

**4.** *диал. кар.* **сираҡ** [2].

**ТӨЙӨРӨМЛӘНЕҮ** *к.* Төйөрөм (1 мәғ.) хәлгә килеү, төйөрөм булыу. *Төйөрөмләнеп тороу.* ■ *Япраҡ ярырға төйөрөмләнгән бөрөләрҙе күреп, нисек һөйөнгәйне бит ҡыҙый.* Т. Килмөхәмәтов.

**ТӨЙӨРСӨК** *и.* Бәләкәй генә төйөр.

**ТӨЙӨРСӨКЛӘНЕҮ** *к.* Төйөрсөк-төйөрсөккә әйләнеү, төйөрсөклө-төйөрсөклө булыу. *Биш көн үтеп китте, коралай ашаманы. Йөндәре йәмһеҙ булып төйөрсөкләнде.* З. Хисмәтуллин.

**ТӨЙӨРСӘ** *и. кар.* **төйөрсөк.**

**ТӨЙӨҪ** *и. диал. кар.* **тырыз** [1] 1.

**ТӨЙӨҮ** [1] *к.* **1.** Бер үк урынға ныҡ-ныҡ итеп, ҡабат-ҡабат һуғыу. *Өҫтәл төйөп ҡысҡырыу.* ■ *Ҡыуғандар Колчак ғәскәрен елкәһен төйөп.* Р. Ниғмәти. *«Нисек сабындырайым?» — тигән Миңлебикә. «Нисек булһа ла ярар. Миндектең төйтәһе менән төй ҙә төй»,— тигән әбей* (Әкиәттән). / Ниҙеңдер осо менән ныҡ-ныҡ төртөп тығыҙлау. *Төйөп тултырыу.* ■ *Әмир бағана төбөн төйә башланы.* Х. Ғиләжев.

**2.** Ваҡлау, йомшартыу йәки көбөнән һурҙырыу өсөн махсус ҡорал осо менән ныҡ-ныҡ һуғып иҙеү. *Тоҙ төйөү.* ■ *[Килен] ҡулына төйгөс алды, тары төйә башланы.* Ш. Насыров.

**3.** *күсм.* Ихласлап, ныҡ итеп ашау. *Икмәк менән майҙы төйөү.*

**4.** *диал. кар.* **тапау** [1] 7. *Ит төйөү.*

**ТӨЙӨҮ** [2] *к.* **1.** Бауҙы салып алып, ныҡ итеп тартыу, төйөн яһау; төйнәү. *Арҡанды төйөү. Епте төйөү.*

**2.** Киң сепрәккә һалып, остарын ҡаушырып бәйләү; төйнәү. *Нәсимәнең балаһы бәләкәс булғас, .. сәңгелдәккә һала ла, ауыҙына икмәк сәйнәп төйгән сепрәк имеҙлекте ҡаптыра ла китә.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Йоҙроҡ төйөү** йоҙроҡто йомарлау. **Йүгән төйөү** йүгән яһау. *Ҡыҙыл ғына күндән йүгән төйҙөм, килешә төштө күрән дүнәнгә* (Халыҡ йырынан). **Ҡашты төйөү** *кар.* **ҡаш** [1].

**ТӨЙПӘК** *и. диал. кар.* **төйөр** 1.

**ТӨЙПӘКЛӘНЕҮ** *к. диал.* Төйөрләнеү.

**ТӨЙРӘҮ** *к.* Үтә сәнсеп ҡаптырыу, беркетеү. *Булавка менән төйрәп ҡуйыу.*

**ТӨЙРӘҮЕС** *и. диал.* Булавка.

**ТӨЙТӨ** *с.* Ҡараңғы сырайлы, томһа. *Төйтө ҡараш. Төйтө кеше.*

**ТӨЙТӨК** *с.* Һөҙөлөп торған ҡараңғы сырайлы, томһа. *Төйтөк кеше.*

**ТӨЙТӘ** *и.* Һепертке кеүек нәмәнең кире яҡ осо. *Миндек төйтәһе. Һепертке төйтәһе.*

**ТӨЙТӘЙЕҮ** *к.* Аҫтан һөҙөп, сырайҙы һытып, ҡаш төйөү; томһайыу. *Ишияр Ишкилдин .. шеш ҡабағы аҫтынан төйтәйеп ҡараны.* В. Нафиков.

**ТӨЙӘ** *и.* Ашыҡ уйнағанда ашыҡтың алсыға ҡаршы, йөҙ түбән ятышы.

**ТӨЙӘК** *и.* **1.** Эйәләшкән, гел килеп торорға өйрәнгән урын. *Мал төйәге. Төйәк һайлау. Төйәк итеү.* ■ *Сакабай биләненә етеп, үҙебеҙҙең йәй көнө бесән сапкандағы төйәккә бороолдом.* С. Кулибай. *Бөҙрә тирәктәр араһында бәрҙе, багры балыҡтарының төйәге.* З. Биишева.

**2.** Урынлашып, ғүмер итеп торған ер. *Ата-баба төйәге. Тыуған төйәк. Төйәк короу.* ■ *Ата-олатайҙар әүәл-әүәлдән шул ауылды төйәк иткән.* Т. Килмөхәмәтов. *Ҡуҡкә ашкан Уралым — минең изге төйәгем, һеҙҙе һөйә йөрәгем.* Салауат Юлаев.

**3.** *диал.* Тибен. *Төйәк тибеү.*

**ТӨЙӘКЛӘНЕҮ** *к.* Йәшәр өсөн урынлашыу; төйәк ҡороу. *Уны [Зиннәтте] төйәкләнә алмай, ил өҫтөндә йөрөү еләткән.* Ф. Иҫәнғолов. *Кешеләр Уралға еткәс, был ерҙә ҡот барҙыр, тип, .. төйәкләргә уйлаған* (Хикәйәттән).

**ТӨЙӘКЛӘҮ** *к.* **1.** Билдәле бер ергә килеп торорға өйрәнеү, бер урынға эйәләшеү. *Һыу буйына төйәкләү.*

**2.** Йәшәр өсөн урынлашыу. *[Игенселәр] сал Уралдың сыуаҡ көн битләүенә төйәкләгән.* Н. Иҙелбай.

**ТӨК** [1] *и.* **1.** Кеше, йәнлек, хайуан тәнендәге ваҡ йөн. Ул *[Фәхри] .. төк баҫҡан итләс ҡулын һелтәп ҡуйҙы.* Б. Бикбай. *[Дәүләтов] ҡырыныуға айырата иғтибар бирә, һаҡал, мыйыҡтарының төгөн дә күрһәтмәй.* С. Агиш. *Ҡуйы ҡара керпегең, бирсе миңә бер төгөн* (Халыҡ йырынан).

**2.** Үҫемлек һабағындағы еп кеүек үҫенте. *Кесерткән төктәре.*

**ТӨК** [2] *и.* Ҙур итеп уралған төргәк. *Бесән төгө.* ■ *Янғындан һуң Әхмәҙи келәттең ҡутарып ташланған ҡабыҡ, ҡаҫырыҡтары араһынан сит-сите көйгән ике генә төк тауар тапты.* Ж. Кейекбаев.

**ТӨКЛӨ** [1] *с.* Төгө бар, йөнлө. *Төклө ҡул.*

**ТӨКЛӨ** [2] *с.* **1.** Мал-мөлкәтле, етешле. *Ҡараҡтар уҙ-ара: «Бөгөн ҡайһы байға барабыҙ, ҡайныһы төклө?» — тип һөйләшә башланы* (Әкиәттән).

**2.** Муллыҡҡа, етеш хәлгә килтерә торған, файҙалы. *Ошо төклө хеҙмәтегеҙ османы һис бушка, елгә, уҙ емешен биреп һеҙгә, килтерҙе ул ҙур еңеүгә.* Н. Иҙелбай.

♦ **Төклө аяғың менән** *кар.* **аяҡ** [1].

**ТӨКЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **төкләү** [1].

**ТӨКЛӘҪ** *с.* Тәнендә йөнө күп; йөнтәҫ. *Төкләҫ кеше.*

**ТӨКЛӘҮ** [1] *к.* Төк итеп, төргәк итеп урау, урап бәйләү. *Бесәнде төкләү. Тауарҙы төкләү.*

**ТӨКЛӘҮ** [2] *к. диал.* Тослау.

**ТӨКӨ** [1] *и.* Ат муйынының ҡамыт һуғып шешкән ере. *Төкө булыу.*

**ТӨКӨ** [2] *и. диал. кар.* **дөмбөр** [1] 1.

**ТӨКӨЛӨҮ** *к.* Ҡаты бер нәмәгә барып һуғылыу; бәрелеү. *Һалдарға, .. кәмәләргә төкөлә-төкөлә бурәнәләр ага.* Ғ. Ғүмәр.

**ТӨКӨМӘ** [1] *и. диал.* Төкәтмә.

**ТӨКӨМӘ** [2] *и. диал. кар.* **төкө** [1].

**ТӨКӨРӨК** *и.* Ауыҙ эсен, ашаған аҙыҡты ебетеп торған шыйыҡлыҡ. *Хәлимә .. икмәк сәйнәп төйгән сепрәк имеҙлекте төкөрөк менән .. ебетеп, бәпесенең ауыҙына ҡаптырҙы.* Һ. Дәүләтшина. / Ауыҙҙан сығарған шул уҡ шыйыҡлыҡ. *Төкөргән төкөрөк. Төкөрөк сәсеү.*

♦ **Бесәй төкөрөгө** бик әҙ, бәләкәй нәмәгә әйтелә. *Ә ҡулға килеп ингән аҡса — бесәй төкөрөгө.* Ғ. Лоҡманов. **Кәкүк төкөрөгө** үлән һабағына балдаҡлап ҡына быҙырлатып һалған күбәләк йомортҡалары.

**ТӨКӨРӨКЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **төкөрөкләү.**

**ТӨКӨРӨКЛӘҮ** *к.* Төкөрөк менән еүешләү. *Ҡәләмде төкөрөкләп яҙыу. Төкөрөкләп йәбештереү.* ■ *— Табандарҙы төкөрөкләп, аҡ ҡайынға бүйланыҡ.* А. Игебаев.

**ТӨКӨРӨНӨҮ** *к.* **1.** Үҙ алдыңа йыш-йыш төкөрөү. *Төкөрөнөп ултырыу.* ■ *Һылыу үҙе белгән доғаларҙы уҡып, тирә яғына ҡарап төкөрөндө.* Т. Йәнәби.

**2.** Нимәгәлер ҡарата сиктән тыш ризаһыҙлыҡ, асыу, ерәнес белдереү. *Мәскәй: «Шуны ла булдыра алмағас, шайтан булып йөрөүең короһон!» — тине лә төкөрөнөп ҡуйҙы, ти* (Әкиәттән).

**ТӨКӨРӨҮ** *к.* **1.** Ауыҙҙан төкөрөк сығарыу. *Лас иттереп төкөрөү. Сырт төкөрөү. Төкөргән төкөрөк.* ■ *Солтангәле ҡашын сирылтып, теш араһынан сарт-сорт төкөрҙө.* Я. Хамматов. /Ауыҙҙағы бер нәмәне тын менән атылдырып сығарыу. *Көнбағыш ҡабығын төкөрөү.* ■ *Йәш ҡатын ауыҙындағы һағыҙын төкөрөп ташланы.* М. Тажи.

**2.** *кусм.* Һанға, иғтибарға алмай, ҡул һелтәү. *Төкөрөп ҡарау. Төкөрөп ҡуйыу.* ■ *— Төкөрҙөм мин Ныязғолдоң повозкаларына. Үҙемдең кола атым һау булһын.* Һ. Дәүләтшина. *Мин, «тәүфиҡһыҙ», төкөрөп ауылға, «эш ҡылырға» киттем ҡалаға.* Ғ. Амантай.

♦ **Ашаған табаҡҡа төкөрөү** *кар.* **табаҡ** [1]. **Йөҙгә төкөрөү** хурлыҡ килтереү. **Ҡан төкөрөү** 1) ауырыу йәки яраланыу сәбәпле ауыҙҙан ҡан сығарыу. *Үпкә сиренән ҡан төкөрөү;* 2) ҡаты ғазап күреү. *Ҡан төкөрөп йәшәү.* **Төкөрмәй ҙә** иҫе лә китмәй, аптырамай ҙа. **Төкөр донъяһына** бер нәмәгә лә иҫ китмәҫкә, бер ҙә әһәмиәт бирмәҫкә кәңәш итеү һүҙе. *Төкөр донъяһына, бул түҙемле, ағыулама юҡҡа тамырыңды!* Ш. Бабич. **Түбәгә төкөрөп ятыу** бер ни эшләмәй, буш ятыу. *Бынан ары ҡыш буйы түбәгә төкөрөп ятыуҙан үҙгә эш тә юҡ.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТӨКӨРТӨҮ** *к. йөкм. кар.* **төкөрөү.**

**ТӨКӨС** *с. диал.* Төйтөк.

**ТӨКӨТӨЛӨҮ** *к. төш. кар.* **төкөтөү** 1.

**ТӨКӨТӨҮ** *к.* **1.** Ҡаты бер нәмәгә ныҡ итеп төрттөрөү. *Түбә таҡтаһы түбән. Өрлөгөнә башты төкөтмәҫ өсөн эйелеп йөрөргә кәрәк.* Я. Хамматов.

**2.** *диал.* Төкәтеү.

**ТӨКӨҮ** *к.* **1.** Ҡаты бер нәмәгә ныҡ итеп алып барып төртөү. *Терһәкте төкөү. Түбыҡты төкөү. Башты төкөү.*

**2.** Мөгөҙ, маңлай менән ныҡ итеп төртә һуғыу (һарыҡ, кәзәгә ҡарата). *Ҡапыл әйләнеп улар [кәзәләр] төкөмәксе булдылар.* Ғ. Амантай.

♦ **Кәзә төкәү** *кар.* **кәзә.**

**ТӨКӨШӨҮ** *к. урт. кар.* **төкөү** 2. *Кәзәләр, .. кәртә өҫтөнә менеп, төкөшөп, шаярып йөрөй.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТӨКӨШТӨРӨҮ** *к. йөкм. кар.* **төкөшөү.** *Кәзәләрҙе төкөштөрөү.*

♦ **Таҙ төкөштөрөү** малайҙар уйыны (ике «таҙ» дүрт тағанлап маңлайҙарын терәшеп этешә; ҡайһы яҡ сигендереп алып китһә — шул еңә).

**ТӨКӘЛЕҮ** *к.* Яҡынлап барып төртөлөү; терәлеү. *Ул ялан Кәсәүни тигән түмәләстән башлана ла, .. Сергей тигән рус ауылының иген яланына барып төкәлә.* Һ. Дәүләтшина. *Баржа мороно төкәлде уң ярға килеп.* Я. Ҡолмой.

**ТӨКӘМӘ** *и. диал. кар.* **төкө** [1].

**ТӨКӘНЕҮ** *к. иҫк.* Аҙағына етеп төртөлөү; бөтөү. *Төкәнмәҫ дәүләт. Юл төкәнде.* ■ *Байҙарҙың малы төкәнде.* «Батыршаның хаты».

**ТӨКӘТЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **төкәтеү.** *Төкәтелгән бура.*

**ТӨКӘТЕҮ** *к.* **1.** Яҡын алып барып төртөлдөрөү; терәтеү. *Атты ҡоймаға төкәтеү. Төкәтеп ҡуйыу.*

**2.** Ҡушып, терәтеп һалыу (йорт-ҡаралтыны). *Бура төкәтеү. Уҡыу йортон клубҡа төкәтеп эшләгәндәр.*

**ТӨКӘТМӘ** *и.* Төкәтеп, ҡушып һалынған йорт-ҡаралты. *Утыҙынсы йылдарҙа уҡ төҙөлгән был йорттоң бирге башына һуңыраҡ .. төкәтмә төкәтелгән.* «Ағиҙел», 1980, № 5.

**ТӨКӘШЕҮ** *к.* Үҙ-ара килеп терәлеү. *Төкәшеп торған ауылдар.*

**ТӨЛКӨ** *и.* **1.** Эттәр ғаиләһенә ҡараған ослораҡ моронло, оҙон ялбыр ҡойроҡло йыртҡыс йәнлек. *Аҡ бауыр төлкө. Ҡуҡ төлкө. Ҡара төлкө. Ҡыҙыл төлкө. Саптар төлкө. Төлкө тиреһе. Төлкө эҙе.* ■ *[Тайморзин] Ҡапҡанды .. икенсе урынға күсереп һалып та ҡараны, төлкө ҡапҡанға яҡын килмәне.* М. Тажи. **Аҡ төлкө** ҡыш көнө аҡ төҫтә була торған төньяҡ төлкөһө. **Ҡарһаҡ төлкө** *кар.* **ҡарһаҡ** [2].

**2.** *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Төлкө тун.*

**3.** Хәйләкәр, ялағай кешегә ҡарата әйтелә. *Бер хәйләгә тотонһа, ҡатын-ҡыҙ төлкө бит инде ул.* И. Ғиззәтуллин. **Ҡарт төлкө** хәйләкәр оло кешегә ҡарата әйтелә.

● *Ҡарт төлкө ауға эләкмәй.* Әйтем.

**ТӨЛКӨҒОЙРОҠ** *и.* Ялбыр башлы ҡыяҡлы үлән.

**ТӨЛКӨЛӘНЕҮ** *к.* Хәйләкәр ҡыланыу, хәйләкәрләнеү, хәйләләү.— *Тотоп алып, имене бирәйем әле мин уның! Арыш тигәндә ҡалай төлкөләнеп алдыңдан, артыңдан әйләнеп йөрөй.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТӨЛКӨСӨ** *и.* Төлкө аулаусы.

**ТӨЛӨК** *и.* **1.** Ағас ҡыуышындағы йәнлек ояһы. *Тейен төлөгө. Кеш төлөгө.*

**2.** *кусм.* Йәшәп торор тыныс урын; оя. *Бала-*

*ларға төләк булһын тип, өй һалдым.* **Йән төлөгө** йәнгә тынысльыҡ табыр урын.

**ТӨЛӨКҺӨҘ** *с.* Йәшәр, торор урынһыҙ. *Төләкһеҙ кеше.*

**ТӨЛӘЙ** *и. иҫк.* Ҡараңғы, төпкөл урын. *Төлкө юртмаҫ төләйҙән төндә үтеп барамын* (Ҡобайырҙан).

**ТӨЛӘМ** *и.* Бик бәләкәй ваҡыт, ара өлөшө. *Йәйләүселәр башҡа бер төләм дә ҡала алмай бында.* Ғ. Вәлиев.

**ТӨЛӘҮ** *к.* **1.** Йөн, ҡауырһын ҡойоу (ҡош, йәнлеккә ҡарата). *Төләгән өйрәк.* / Ҡау һалыу (йылан, саянға ҡарата). *Йылан төләй.*

**2.** Ҡауаҡланып һыҙырылыу (тән тиреһенә ҡарата). *Төләгән танау.*

**ТӨМЗӨК** *и. диал.* Түҙлек, төпһә.

**ТӨМӨЗ** *и. диал.* Түҙлек, төпһә.

**ТӨМҺӘЙ** *с.* Кәйефһеҙ, боҙоҡ ҡиәфәтле; томһа. *Төмһәй генә турһыҡ, ҡап-ҡара сәсле, сөм ҡара күҙле Тимербулат әсәһенә бирешмәҫкә тырышты.* Һ. Дәүләтшина.

**ТӨМҺӘЙЕҮ** *к.* Кәйефһеҙләнеп, төҫ боҙоу; томһарыу. *Ҡотлояр уға төмһәйеп ҡараны ла, йәлләпме, нишләп, өндәшмәне.* Һ. Дәүләтшина.

**ТӨМҺӘҮ** *к. диал.* Шнкләнеү.

**ТӨМӘЙ** *и. диал.* Ҡара көртмәле (*ҡар.* **көртмәле**).

**ТӨМӘН** [1] *и. тар.* Мең кешелек ғәскәр башлығы; мең башы.

**ТӨМӘН** [2] *с. диал.* Көңгөрт (төҫкә ҡарата).

**ТӨН** *и.* **1.** Тәүлектең ҡояш байыған ҡараңғы миҙгеле. *Йәйге төн. Оҙон төн. Төн уртаһы.* ■ *Йылҡыбай тоҙҙо ҡарауыллап төнө буйы ятты ла, таң алдынан, йоҡоһон еңә алмай, йоҡлап китте, ти* (Әкиәттән). **Ете төн уртаһы** төндөң иң үҙәге. *[Ҡыраубикә:] Бынау ете төн уртаһында ҡайҙа бараһығыҙ, балам?* Д. Юлтый. **Ҡара төндән** таң беленмәҫтән. *[Ғәлимә:] Ҡара төндән киткән кеше әле лә юҡ.* Х. Ибраһимов. **Төн битендә** төндә, төн ваҡытында.

**2.** *иҫк.* Көньяҡҡа ҡаршы яҡ; төньяҡ. *Төн башҡорттары.*

♦ **Аҡ төндәр** ҡараңғы төшөп тормай, киске эңер туранан-тура таңға күскән төньяҡтағы йәйге төндәр. **Ҡәҙер төнө** дини хөрәфәт буйынса, рамаҙан айының егерме алтыһындағы күк ҡабағы асылған төн (йәнәһе, ҡапыл яҡты булып китә, шул саҡта әйтеп өлгөргән теләк ҡабул була). **Поляр төн** *ҡар.* **поляр.**

**ТӨНГӨ** *с.* Төн миҙгелендәге. *Төнгө ваҡыт. Төнгө йоҡо. Төнгө ҡараңғылыҡ. Төнгө поезд. Төнгө эш.* ■ *Төнгө сәғәт бер ине. Ҡунаҡтар тарала башланы.* Д. Юлтый.

**ТӨНГӨЛӨК** *и.* Төнгө ваҡыт. *Кис менән атты эсереп, арбаға бәйләп ҡуйҙылар ҙа .. төнгөлөккә етерлек бесән һалдылар.* Ғ. Ибраһимов.

**ТӨНДӨК** *и. диал.* Төнлөк.

**ТӨНДӘ** *р.* Төн ваҡытында; төнөн. *Төндә йөрөү. Төндә эшләү.*

**ТӨНЛӨК** *и.* **1.** Өй-ҡаралтының эсен елләтеү өсөн стенаһына йәки түбәһенә яһалған тишек. *Тирмә төнлөгө. Мунса төнлөгө. Төнлөктө асыу. Төнлөктө ябыу.* ■ *Өстаған тирәһендәге төтөн, быу .. сағараҡтағы әҙ генә асып ҡуйылған төнлөккә табан юғары үрмәләй.* И. Көҫәпҡол.

**2.** Мал һарайының түбәһендәге бесән төшөрә торған тишек. *[Әхтәрйән] быҙау янындағы төнлөктө асып, ҡурпы төшөрҙө.* Р. Низамов.

**ТӨНЛӨКСӘ** *и.* Өйҙө елләтеү өсөн тәҙрәгә яһалған асып-япмалы өлгө; форточка. *Ҡышҡы көндә бер ҡарабаш турғай килеп инде минең бүлмәмә. Төнлөксәнән йылы тартҡанмылыр, әллә емме?.. Барҙыр бер нәмә.* Ҡ. Даян.

**ТӨНЛӘТЕҮ** *к.* Төнгә ҡалыу, төн еткереү. *Үтәголов уңынсы класс уҡыусыларына арналған айырылышыу кисәһенән төнләтеп ҡайтып, йоҡларға ятты.* Ж. Кейекбаев.

♦ **Ат төнләтеү** *шул уҡ* **ат ҡуныу** (*ҡар.* **ат** [1]1).

**ТӨНЛӘҮ** *к.* Төн ҡуныу. *Ҡараңғы төшөү менән полк оҙаҡ барманы. Дүрткә бүленеп төнләргә булдылар.* А. Таһиров.

**ТӨНӨН** *р.* Төн ваҡытында; төндә. *Төнөн күккә ай ҡараһа, алтындай балҡый Урал тау, көндөҙ күккә көн ҡалҡһа, көмөштәй балҡый Урал тау.* Салауат Юлаев.

**ТӨНТӘЙ** *с. диал.* Көмрө.

**ТӨНТӘЙЕҮ** *к. диал.* Көмрәйеү.

**ТӨНЬЯҠ** *и.* **1.** Ер йөҙөнөң көньяҡҡа ҡаршы тарафы. // *Төньяҡ полюс. Төньяҡ киңлек.* ■ *Төньяҡтан сыҡҡан һалҡын ел әллә кемгә асыулангандай булып ыжғыра.* Ғ. Дәүләтшин. *Ҡош юлдары ҡалҡһа күк йөҙөндә, кейек ҡоштар осор төньяҡҡа* (Халыҡ йырынан). / Шул йүнәлештәге урын, ер, ил, дәүләт, материк өлөшө. *Африканың төньяғы. Россияның төньяғы.*

**2.** (*баш хәреф менән*) Европа һәм Азия материктарының иң ситендәге һыуыҡ климатта ятҡан территория һәм шулай уҡ ер шарының уға эргәләш булған поляр өлкәһе; Арктика. *Төньяҡ байлыҡтары.*

**ТӨНӘ** *р.* Бер нисә көн элек, анау бер көнө. *[Гөлшәкәр:] Төнә бер көн әлеге Хәлисә ҡыҙы осраны.* И. Ғиззәтуллин.

**ТӨНӘГЕ** [1] *с.* Анау бер көнгө. *[Гөлнур:] Ағай, сабатамдың башын төнәге кеүек ваҡ-ваҡ шаҡмаҡтар менән яһа, йәме?* Ғ. Шәрипов.

**ТӨНӘГЕ** [2] *р. диал.* Төнә.

**ТӨНӘГЕН** *р. диал.* Төнә.

**ТӨНӘГЕС** *и. диал.* Төнәк.

**ТӨНӘЙ: төнәй баҙарына китеү** *диал.* әүен баҙарына китеү (*ҡар.* **баҙар**).

**ТӨНӘК** *и.* Тауыҡ төнәй торған таяҡ. *Дуҫым саҡырҙы ҡунаҡҡа, тауыҡ бирҙе бүләккә. Һайлап алдым оҡшағанын үҙем менеп төнәккә* (Халыҡ йырынан).

**ТӨНӘРЕҮ** *к. диал.* Ҡараңғыланыу.

**ТӨНӘТЕҮ** [1] *к.* **1.** Төнгө йоҡоға китергә ирек биреү. *Тауыҡтарҙы төнәтеү.*

**2.** *диал.* Төн ҡундырыу (мәйетте).

**ТӨНӘТЕҮ** [2] **1.** Дауа өсөн үҫемлектең сәскә, һабаҡ йәки тамырын шыйыҡлыҡҡа һалып ултыртыу.

**2.** Шарапҡа еләк-емеш һалып ултыртыу.

**ТӨНӘТМӘ** *и.* **1.** Дауа өсөн үҫемлектең сәскә, һабаҡ йәки тамырын һалып ултыртҡан шыйыҡлыҡ. *Әлморон төнәтмәһе.*

**2.** Еләк-емеш һалып ултыртҡан шарап.

**ТӨНӘҮ** *к.* **1.** Төнгө йоҡоға китеү (ҡош-ҡортҡа ҡарата). *Төндә тауыҡтар ҙа төнәй, төнәй кәкүк, турғайҙар.* А. Игебаев. / *күсм.* Йоҡлау. *Нигмәт-*

*йән .. өҫтәл ситенә башын төртөп, төнәй башланы.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Төн уҙғарыу. *Моңкилмәҫтең төнәр ере бер әбейгә тура килде, ти* (Экиәттән).

**ТӨНӘҮЕС** *и. диал.* Төнәк.

**ТӨҢК** *и. кар.* **төк** [2].

**ТӨҢКӘЙЕҮ** *к.* **1.** Йөҙ түбән ауыу.

**2.** *күсм.* Йоҡоға китеү.

**ТӨҢКӘЛЕҮ** *к.* **1.** Бер төрлө ваҡ эшкә йәки яҙыуға оҙаҡ ваҡыт текләү; текәлеү. *Төңкәлеп уҡып ултырыу.*

**2.** *диал.* Тарыу, юлығыу.

**ТӨҢКӘЛТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **төңкәлеү.**

**ТӨҢКӘТЕҮ** *к.* Яҡын алып барып төртөлдөрөү; төкәтеү. *Бер-бер хәлгә төңкәтеү.*

**ТӨҢӨЛДӨРӨҮ** *к. йөкм. кар.* **төңөлөү.** *Кешенән төңөлдөрөү. Донъянан төңөлдөрөү.*

**ТӨҢӨЛӨҮ** *к.* Өмөт өҙөү. *Ырыҫбикә инәй атайымдың нисек сәсәк менән ауырығанын, үлә-үлә тип, төңөлөп бөткән ерҙән иҫән ҡалғанын әкиәт кеүек итеп һөйләй.* Ш. Янбаев. / Өмөт өҙөп, һыуыныу. *Донъянан төңөлөү.* ■ *Бала тора-килә күкрәк һөтөнән төңөлдө, ашауға һалышты.* Ж. Кейекбаев.

● *Итен күр ҙә һурпаһынан төңөл.* Әйтем.

**ТӨҢӨЛӨШӨҮ** *к. урт. кар.* **төңөлөү.** *Төңөлөшөп бөтөү.*

**ТӨҢӨЛТӨҮ** *к. кар.* **төңөлдөрөү.**

**ТӨҢРӘЙ** *и. диал. кар.* **ыҫлыҡ** 1. *Һауыттың ауыҙын төңрәйгә ҡуйып ыҫлайһың.*

**ТӨҢӘЙ** *и. диал. кар.* **теүәл** 2.

**ТӨП** [1] *и.* **1.** Соҡор-саҡыр, һауыт-һабаның һ. б. аҫҡы яғы. *Бураҙна төбө. Йәшник төбө. Кәмә төбө. Соҡор төбө. Ток төбө.* ■ *[Үмәр:] Йә, ҡыҙым, .. көрәк-тырмаларҙы арба төбөнә һал да, әйҙә, ҡайтайыҡ инде.* Һ. Дәүләтшина. / Эсе соҡор нәмәнең, һауыт-һабаның аҫтан ҡаплап торған өлөшө. *Быймаға төп һалыу. Мискәгә төп ҡуйыу.*

**2.** Һыу аҫтындағы ер. *Йылға төбө.* ■ *Һаҙамыҡ түгел, ҡырсын төп, өйрәк, аҡкош, ҡыр ҡаҙы йөҙөп йөрөй — шундай күп.* «Урал батыр». / *күсм.* Ниҙеңдер тәрәндәге, эске нигеҙе. *Йөрәк төбө. Күңел төбө.* ■ *Уйлаһаң барын төптән алып, иҫең китә бөйөк еңеүгә.* Ғ. Амантай.

**3.** Ниҙеңдер алдынан ҡарағанда иң эстәге, алыҫтағы өлөшө. *Мәмерйә төбө. Урман төбө. Төпкә ятыу. Төпкә һалыу.*

**4.** Осҡо аттың артындағы егеү урыны. *Төптәге ат.* ■ *[Хәйрулла:] Көслө атты төпкә егәләр. Ат йөк тартыуға шул тиклем өйрәнә, аҙаҡтан оска ектеңме — тарта белмәй.* С. Агиш.

**5.** Ултырған оҙон нәмәнең аҫҡы өлөшө; *киреһе* ос. *Бағананың төбө. Ағастың төбө.* / Ҡырҡылған, һынған ағастың аҫта ултырып ҡалған өлөшө; түҙлек. *Төпкә эләгеп йығылыу.*

**6.** Үҫемлектең иҫәп берәмеге. *Бер төп алма. Йөҙ төп еләк.* ■ *Һәр төп йәшелсә балалар ҡарамағында үҫә.* Ғ. Ғүмәр.

**7.** Ағзаның кәүҙә менән тоташҡан урыны. *Бот төбө. Ҡолаҡ төбө.* / Сәс, керпек кеүек нәмәнең үҫеп сыҡҡан урыны. *Керпек төбө. Сәс төбө.* / Кейем өлөштәренең тоташҡан урыны. *Ең төбө. Салбар төбө.*

**8.** Үҫемлектең тамыр тирәһе. *Ағасты ултыртыу ғына етмәй, ул үҫһен, япраҡланһын, емеш бирһен өсөн тәрбиәләргә, төбөн йомшартырға, һыу һибеп торорға кәрәк.* М. Тажи. / Нимәнеңдер эргәһе, ышығы йәки уға бик яҡын булған урын. *Ағас төбөндә ултырыу. Ҡапҡа төбөнән китмәү. Тырманы кәбән төбөнә ҡуйыу.*

**9.** Сабып алынған үлән йәки иген урыны. *Борсаҡ төбө. Сөгөлдөрҙө арыш төбөнә сәсеү яҡшы.*

**10.** Китап, дәфтәрҙең тегелгән яҡ сите. *Китаптарҙың .. ҡатырға төптәре матур итеп биҙәлгән.* Ғ. Ғүмәр.

**11.** Ниҙеңдер аҙаҡҡы ҡалдығы. *Аҙаҡ үҙе тарта төбөн генә, тәүҙә һиңә бик мул һурҙырып махорҡаһын.* Ф. Бикбов.

**12.** *күсм.* Ниҙеңдер башланғыс биргән нигеҙе; сығыш.— *Һин, ҡустым, миңә ейән булаһың, һинең әсәйеңдең төбө бөрйән була.* Ғ. Дәүләтшин.

♦ **Бер төптән** 1) бер уй, ниәт менән; берҙәм. *Үрге урам егеттәре әйбәт малайҙар.. Улар һәр ваҡыт бер төптән йәшәй, бер-берен бирмәй.* Ж. Кейекбаев; 2) бер юлы, бер ыңғайҙан. *Ун бишләп быҙау бер төптән сирләй бит, үлә-нитә ҡуйһалар, бик насар булыр.* Б. Бикбай. **Йәһәннәм төбө** *кар.* **йәһәннәм. Морон төбө** *кар.* **морон. Тел төбө** *кар.* **тел. Тормош төбө** *шул уҡ* **тормош төпкөлө** (*кар.* **төпкөл**). **Төбөнә төшөү** асылын, мәғәнәһен төшөнөү. **Төп башына ултыртыу** *кар.* **ултыртыу** 14. **Төп күтәрә** *кар.* **күтәреү. Ус төбөндәге кеүек** *кар.* **ус.**

● *Сабыр төбө һары алтын.* Мәҡәл.

**ТӨП** [2] *с.* **1.** Алдан ҡарағанда иң эстәге; төптәге, төпкө. *Төп яҡта ятыу. Урындыҡтың төп яғы.*

**2.** Башланғыс, нигеҙ сифатындағы; тәүге. *Төп йорт. Төп ер. Төп халыҡ.* ■ *Бара-тора ауылдаштары ғына түгел, хатта улар үҙҙәре лә мулла ҡушҡан төп исемдәрен оноткан.* З. Биишева. / Нимәнеңдер нигеҙен, асылын сағылдырған; нимәгәлер нигеҙ, сығанаҡ булған. *Эш хаҡының төп фонды.*

**3.** Урын, дәрәжә буйынса беренсе кимәлдәге. *Төп ҡоҙа. Төп ҡунаҡ. Төп хужа.* ■ — *Үҙеңде ҡыҙҙың төп ағаһы итеп, минең эшкә аяҡ салмаһаң, .. ҡалынға алып барырмын.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Әһәмиәт буйынса беренсе урындағы, мөһим булған. *Төп бурыс. Төп көс. Төп мәсьәлә. Төп сәбәп. Төп талап. Төп тема. Төп шарт.* ■ *Минең атайымдың төп һөнәре тауҙан сажинлап таш сығарыу, таш нигеҙҙәр, таш кәләттәр һалыу ине.* Т. Йәнәби.

**ТӨП** [3] *окш.* Бәләкәй тос нәмә ҡатҡыл ерг[ә] һ. б. ҡапыл һуғылғанда сыҡҡан тауышты бел[...] дергән һүҙ. *Төп итеп йығылып төшөү.*

♦ **Төп булыу** *бал.* йығылып төшөү.

**ТӨП-** *киҫ.* Тө[...] ижеге менән башланған тө[...] сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрә[...] жәһе бирә. *Төп-төҙ. Төп-төпөш.*

**ТӨПКӨ** *с.* **1.** Төп яҡтағы, эстәге. *Төпкө өй Төпкө яҡ.* ■ *Өйҙөң төпкө бүлмәһенән был я[...] бүлмәгә дүрт кеше сығып килә ине.* Һ. Дәүләт[...] шина. *Төпкө мөйөштәге бер тимер карауат[...] Гөлдәр йоҡлай.* К. Кинйәбулатова.

**2.** Һыуҙың түбәнге ҡатламындағы; төбөндәге

*Төпкө тулкындарға ҡушылдым, төпкө тулкын өҫкә бәргән сакта ҡаяларға, ярға һуғылдым.* Д. Юлтый.

**3.** Төпкә егеүле. *Төпкө ат.*

**ТӨПКӨЛ** *и.* **1.** Ниҙеңдер алдынан ҡарағанда иң эстәге алыҫ урыны. *Урман төпкөлө. Баҡса төпкөлө.* ■ *Бабай Ерән ҡашҡаны миңә ҡалдырып, туғай төпкөлөнә инә.* Й. Солтанов.

**2.** Кеше әҙ йөрөгән алыҫ урын. *Гәрәй уға [дуҫына] Урал төпкөлөндәге берәй ауылға күсеп барып, ваҡытлыса йәшәп торорға .. кәңәш итте.* Б. Бикбай. / Культура үҙәгенән алыҫтағы урын. *Төпкөлдә йәшәү.* // *Төпкөл ауыл. Төпкөл район. [Уҡытыусы:] «Һеҙгә, етер-етмәҫ белем менән төпкөлдән килгән аңһыҙ бала-сағаға, быны нисек төшөндөрөргә?!» — тип бошоноп китә, ахыры.* З. Биишева.

**3.** *күсм.* «Күңел», «йөрәк» кеүек һүҙҙәр менән килеп, берәй төрлө хис, тойғоноң шундағы символик урынын белдерә. *Күңел төпкөлө.* ■ *Сорокиндың әсәһе ҡайғыларын да, шатлыҡтарын да йөрәк төпкөлөнә йәшерергә өйрәнгән инде.* Х. Мохтар. / «Быуаттар», «йылдар» һүҙе менән килеп, бик күптәнге, алыҫ ҡалған заманды белдерә. *[Карам бабай] әленән-әле үткәндәрҙе иҫенә төшөрөп, .. йылдар төпкөлөндә яҙылған тарих биттәрен аса.* Ғ. Вәлиев.

♦ **Тормош төпкөлө** тормоштағы иң түбәнге, иң ауыр шарт.

**ТӨПЛӨ** *с.* **1.** Төп ҡуйыулы; төбө бар. *Төплө мискә. Төплө һауыт.*

**2.** Аҫҡы өлөшө айырым беленеп (киң йәки ҡаты булып) торған; төбө бар. *Төплө шешек.*

**3.** Ныҡ, тәрән нигеҙле; ныҡлы. *Төплө аҡыл. Төплө белем.* ■ *Ҡадир еткән егет, төплө егет, уйҙы төптән, тәрән алдыра.* Ғ. Амантай. *Был егет ул саҡта, төплө һөнәре булмағанлыҡтан, ҡушҡан бер йомошто йүгереп йөрөп үтәй.* «Ағиҙел», 1967, № 11.

**4.** Тәрән дәлилле, ныҡ нигеҙле; ныҡлы. *Төплө кәңәш. Төплө ҡарар. Төплө сәбәп. Төплө һүҙ. Төплө яуап.* // *Төплө итеп уйлау. Төплө итеп һөйләү.* ■ *[Алдар] шулай оҙаҡ баш ватһа ла, бер төрлө лә төплө фекергә килә алмай.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ТӨПЛӘГЕС:** **ағас төплөгес** ағас төпләй торған машина.

**ТӨПЛӘК** *и. диал.* Күнәсек.

**ТӨПЛӘМ** *и.* Тәртибе менән һалып, бергә тегелгән газета-журнал йәки башҡа ҡағыҙ. *Документтар төпләме. Газеталар төпләмен ҡарап сығыу.*

**ТӨПЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Ныҡлап урынлашыуға мөмкинлек, шарт биреү. *Кешене ауылда төпләндереү.*

**ТӨПЛӘНЕҮ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **төпләү**. *Төпләнгән бейма.*

**2.** Төп ебәреү, тамыр ебәреү. *Юлдың ике яғында ла .. яңы ғына төпләнеп килгән бойҙай, борай, .. һоло баҫыуҙары ята.* Ә. Вәли.

**3.** *күсм.* Ныҡлап урынлашыу; нығыныу. *Төпләнеп ҡалыу. Төпләнеп эшләү.* ■ *Мозаффар ныҡлап эшләү, төпләнеп донъя көтөү уйы менән ҡайтты.* Н. Мусин.

**ТӨПЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **төпләү**. *Күнәк төпләтеү. Ағас төпләтеү.*

**ТӨПЛӘҮ** *к.* **1.** Төп ҡуйыу, төп һалыу. *Күнәк төпләү.* ■ *Зариф ыҫмалалы еп менән бейма төпләп ултыра ине.* С. Агиш.

**2.** Төбө, тамыры менән ерҙән ҡуптарыу. *Ағас төпләү. Урман төпләү.* ■ *Әллә ни тиклем майҙанды биләп ултырған әрәмәлек тотош .. төпләп, һөрөлгән.* И. Ғиззәтуллин.

**3.** Китап, дәфтәр һ. б. нәмәләрҙең биттәрен бергә тегеп, берәй төрлө ҡатырға, ҡалын ҡағыҙ һ. б. менән тышлау. *Китап төпләү.*

**4.** *күсм.* Таман итеү; бөтөрөү. *[Мансур:] Сафа ҡайнаға үҙенең эшен дә алып бара алмай, төпләп ҡуйҙы.* Ғ. Ныязбаев.

**ТӨПӨН** *с. диал.* Йомро. *Төпөн тояҡ.*

**ТӨПӨШ**[1] *с.* Йыуантыҡ, тәбәнәк буйлы. *Төпөш Нигмәтйән ҡарт асыуынан ҡара һаҡалын сәйнәп ултыра ине.* Ғ. Хәйри.

**ТӨПӨШ**[2] *и.* Боттоң төптәге йыуан ҡыҫҡа һөйәге. *Төпөш башы.* // *Төпөш елек.*

**ТӨПРӘ** *и.* **1.** Шыйыҡлыҡтың төпкә ултырған ҡуйыһы. *Май төпрәһе.* ■ *Ғәзизә .. урындыҡ аҫтынан төбөндә төпрәһе генә ҡалған сиректе һөйрәп сығарҙы.* Я. Вәлиев.

**2.** Һутын йәки майын һығып алғандан ҡалған сүп. *Еләк төпрәһе. Киндер төпрәһе. Көнбағыш төпрәһен мал аҙығы итеп файҙаланыу.*

**3.** Дебет, мамыҡ араһындағы ойошҡан төйөр. *Дебеттең төпрәһен алыу өсөн аялайҙар.*

**ТӨПСӨК** *и.* **1.** Күптән, ҙурҙан ҡалған бәләкәй өлөш. *Фариза уға [Мәғфүрәгә] .. турағандан ҡалған ҡаҙы төпсөктәре күтәртеп ебәрҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Тәмәкенең тартҡандан ҡалғаны. *Тәмәке төпсөгө.* ■ *Шамил тәмәкеһен бер-ике һурҙы ла, төпсөгөн иҙәнгә ырғытып, аяғы менән баҫып ҡуйҙы.* Ғ. Ғүмәр.

**3.** *диал. ҡар.* **кинйә** 1.

**4.** *диал.* Түҙлек.

**ТӨПСӨМӘ** *с.* Төпсөп һорашыусан. *Төпсөмә кеше.*

**ТӨПСӨНМӨШ** *с. диал.* Төпсөмә. *Төпсөнмөш малай.*

**ТӨПСӨНӨҮ** *к.* Белергә тырышып ныҡышыу; төпсөү. *Төпсөнөп һорау.* ■ *Ошо ҡарт төпсөнә торғас, Ҡорбановтың быҫраҡ йөҙөн асҡан.* Б. Бикбай.

**ТӨПСӨР** *с.* Төпсөнөүсән; төпсөмә. *Төпсөр кеше.*

**ТӨПСӨРЛӘҮ** *к. диал.* Төпсөнөү.

**ТӨПСӨҮ** *к.* Белергә тырышып, ныҡыу; төпсөнөү. *Төпсөн өйрәнеү. Төпсөп һорау.* ■ *[Кәбир:] Ят һүҙ осраныңы — шуны төпсөргә, нимә икәнен тикшерергә яратам.* С. Агиш.

**ТӨПСӨШӨҮ** *к.* Белергә тырышып, ныҡышыу; төпсөнөү. *Төпсөшөп һорау. Мин уның ҡасан ҡайтырын төпсөшөп торманым.*

**ТӨПТӨ** *р.* **1.** Бөтөнләй, һис. *Төптө белмәй. Төптө ишетмәй. Төптө уйламаған эш.* ■ *[Һөйөндөк:] Бәй, һеҙ йыйылған да икәнһегеҙ, мин төптө абайламай торам.* Д. Юлтый.— *Был урын төптө ярамай. Ҡарағыҙсы, һеҙгә һиҙҙермәй генә ап-ағын килергә мөмкин.* Б. Хәсән.

**2.** Бөтөнләй, тамам. *Төптө киреһен эшләү.*

*Төптө хәлдән тайыу. Төптө юкты һөйләү.* ■ *Һин төптө өлкән егет булғанһың.* Һ. Дәүләтшина.

**ТӨПҺӨҘ** *с.* **1.** Төбө тишек, төбө юҡ. *Төпһөҙ күнәк.* ■ *— Әле был хөкүмәт үҙе урынлашып, нығынып ҡалһа, ярар ине.— Ниңә, әллә уның да ултырған урыны төпһөҙ шүмәнгә окшаймы?* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Төбөнә еткеһеҙ, сикһеҙ тәрән. *Төпһөҙ упҡын.* ■ *Гүйә беҙ сикһеҙ, төпһөҙ диңгеҙ өҫтөндә вак, бик вак юныҫҡылар кеүек йөҙәбеҙ.* Д. Юлтый. / *күсм.* Осо, сигенә сыҡҡыһыҙ. *Хәмит уйлана, ләкин төпһөҙ уйҙарының осона сыға алмай.* И. Нифмәтуллин.

**3.** *күсм.* Нығ дәлилһеҙ; нигеҙһеҙ. *Күп кенә урында йылҡы малын бөтөрөү тенденцияһы күҙгалып күйҙы, ләкин был эштең төпһөҙ һәм зарарлы икәнен колхоз етәкселәре тиҙ төшөнөп алды.* К. Мәргән.

**ТӨПҺӘ** *и.* Ҡырҡылған йәки һынғаи үҫемлектең ерҙәге ҡалдығы; төп. *Әрем төпһәһе.* ■ *Рәзилә алдынғы хужалыҡтарҙа төпһәләрҙең, ботаҡтарҙың, хатта таптарҙың да әрәм ителмәүен, күреп белмәһә лә уҡып белә ине.* Н. Муснн. *[Хәбир] ҡурайын һап бөткәс, төпһәгә ултыра ла .. моңдарын ҡурай аша сығара башлай.* Ә. Вахитов.

**ТӨПҺӘРЕҮ** *ҡ.* Бөтөргәнсә ауҙарыу. *Төпһәрә эсеү. Төпһәрә ҡойоу.*

**ТӨПӘЙ** *ымл.* Баланы йығылып төшөүҙән ҡурсып, киҫәткәндә әйтелә.

□ **Төпәй булыу** (*йәки* **итеү**) *бал.* ҡолау, ҡолап төшөү.

**ТӨПӘЛТӘШ** *с. диал. ҡар.* **төпөш** [1].

**ТӨР** *и.* **1.** Дөйөм бер нәмәнең үҙенсәлекле айырым берәмеге. *Аш төрө. Буяҡ төрҙәре. Ғәскәр төрҙәре. Эш төрө. Ҡорал төрҙәре. Сәскә төрҙәре.* ■ *[Талипов] һабан, сәскес һәм башҡа төр ауыл хужалығы инвентарҙарын ҡар аҫтынан ҡаҙып сығартты.* М. Тажи. *Бәйет һәм йыр — һуғыш фольклорының иң таралған төрө.* К. Мәргән.

**2.** *биол.* Бер төрлө билгеләргә эйә булған заттар йыйылмаһы, иң юғары берәмек иҫәпләнгән төркөмгә буйһонған йәнлек һәм үҫемлектәрҙе классификациялау берәмеге.

**3.** *диал.* Төрлөк.

**ТӨРБӘ** [*ғәр.*] *и.* Ҡәбер өҫтөнә ҡоролған бина; кәшәнә.

**ТӨРГӘК** *и.* **1.** Сепрәккә, яулыҡҡа һалып, төрөп бәйләнгән нәмә; төйөнсөк. *Ҙур төргәк. Ҡулға төргәк тотоу. Төргәкте сисеү.* ■ *Хасбулат олатай баяғы төргәктән айырым йомшаҡ сепрәккә төрөп һалынған Георгиевский Крест менән Ҡыҙыл Байраҡ ордены алып, өҫтәлдең ҡап уртаһына һалып ҡуйҙы.* З. Биишева.

**2.** Осонан осона тәгәрләтеп ураған тауар; төк [2]. *Мин .. контролёрға төргәк-төргәк ситса ташыйым.* С. Агиш. / Оҙонсалап йомарлаған ҡағыҙ. *Өҫтәл өҫтөндә чертеж төргәктәре түҙып ята.*

**3.** Бергә һалынған йәки бәйләнгән бер иш нәмәләр өйөмө. *Төргәкте ныҡсым йомарлап, итек ебе менән нығытып бәйләгәндәр. Унда йоҡа ғына китаптар ине шикелле.* Ж. Кейекбаев. *Гәрәй быйма ҡуныҫынан бер төргәк аҡса сығар[ҙы].* Б. Бикбай. *Ҡеүәтов ҡулындағы ҡағыҙ төргәкте өҫтәлгә ҡуйҙы.* Ә. Вәли.

**ТӨРГӘКЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **төргәкләү.**

**ТӨРГӘКЛӘҮ** *ҡ.* Төргәк итеп төрөү. *Нәмәләрҙе төргәкләү.*

**ТӨРҘӨРӨҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **төрөү.**

**ТӨРҘӘШ** *с.* Бер төргә ҡараған, асылдары, төп эстәлектәре бер булған. *Промыслаларҙа төрҙәш һөнәр үҙләштереү киң таралды.* «Ағиҙел» 1985, № 7.

**ТӨРЖӨК** *с.* Төрөлөп, үргә күтәрелеп торған (иренгә ҡарата).

**ТӨРЖӘЙЕҮ** *ҡ.* Төрөлөп, үргә күтәрелеү (иренгә ҡарата). *Төржәйеп торған ирен.*

**ТӨРЖӘЙТЕҮ** *ҡ.* Төрөп, үргә күтәреү (иренде). *Иренде төржәйтеү.*

**ТӨРКИ** *с.* **1.** Үҙәк Азиянан Кесе Азияға, Көнсығыш Европанан Урта Азияға тиклемге ерҙәрҙә йәшәгән, телдәре нигеҙҙә сингармонизм, агглютинация күренештәре билдәле булған төркөмгә ҡараған. *Төрки халыҡтар.* / Шул төркөмгә ҡараған халыҡҡа мөнәсәбәтле. *Төрки телдәр. Төрки культура.*

**2.** Шул төркөм халыҡтарҙың Урта Азия һәм Урал-Волга өлкәләрендә йәшәгән төркөмдәре (үзбәк, уйғыр, башҡорт, татар һ. б.) өсөн 12—13 быуаттарҙан Октябрь революцияһына тиклемге осорҙа уртаҡ яҙма тел вазифаһын үтәгән. *Төрки тел. Төрки телдә яҙылған китап.*

**3.** *и. мәғ.* Шул халыҡтарҙың Урта Азия һәм Урал-Волга регионадарында йәшәгән төркөмдәре өсөн 12—13 быуаттарҙан Октябрь революцияһына тиклемге осорҙа уртаҡ яҙма тел вазифаһын үтәгән ғәрәп яҙыулы китап теле. *Иҫке төрки. Төрки таныу. // Төрки китап.*

**ТӨРКИСӘ** *р.* Төрки (3 мәғ.) телдә. *Төркисә уҡыу. Төркисә яҙыу. // Төркисәне яҡшы таныу.*

**ТӨРКӨМ** *и.* **1.** Бер ергә тупланған бер нисә кеше, ҡош, йәнлек. *Ҙур төркөм. Ҡыҙҙар төркөмө.* ■ *Тегендә бер төркөм, бында бер төркөм халыҡ йыйылып, ни тураһындалыр ҡыҙыу-ҡыҙыу һөйләшә.* Б. Ишемғол.

**2.** Уртаҡ эш, маҡсат нигеҙендә берләшкән халыҡ. *Төркөм етәксеһе. Төркөмгә тупланыу.*

**3.** Дөйөм бер сифат, үҙенсәлек менән берләшкән нәмәләр йыйымы. *Башҡорт фольклорының әйтем төркөмөндә бер-береһенә бик яҡын торған, бер-береһенә бик оҡшаш булған 13—14 төрлө жанр бар.* Ғ. Амантай.

**4.** Тереклектәр систематикаһында бер нисә ғаиләне берләштергән биологик берәмек. *Бөжәк ашаусылар төркөмө. Йыртҡыстар төркөмө. Кимереүселәр төркөмө.*

**ТӨРКӨМЛӘНЕҮ** *ҡ.* Төркөмгә йыйылыу, төркөм-төркөм йыйылыу; төркөмләшеү. *Баҡыр йөҙлө «тимер» кешеләр төркөмләнеп, ҙур заводтан тышҡа сыҡтылар.* Х. Хәйри.

**ТӨРКӨМЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Төркөм-төркөм итеү, төркөм-төркөм булыу. *Төркөмләп бүлеү. Төркөмләп ултыртыу. Төркөмләп осоу. Кешеләрҙе төркөмләп оҙатыу.*

**2.** Уртаҡ бер сифат буйынса төркөмдәргә бүлеү. *Фактарҙы төркөмләү.*

**ТӨРКӨМЛӘШЕҮ** *к.* Төркөмдәргә берләшеү, төркөм-төркөм булышыу. *Бисәләр күмәкләшеп, төркөмләшеп бер-береһенә сәйгә йөрөшә.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТӨРКӨМСӨЛӨК** *и.* Коллективтың ҡара-ҡаршы маҡсатлы төркөмдәргә бүленгән берҙәм булмаған хәле. *Төркөмсөлөккә ҡаршы көрәш.*

**ТӨРКӨМСӘ** *и.* **1.** Төркөм эсендәге бәләкәйерәк берәмек.

**2.** *лингв.* Һүҙ төркөмөнөң бер үк форма менән билдәләнгән грамматик төрө. *Рәүеш төркөмсәләре. Һан төркөмсәләре.* ■ *Башҡорт телендә ҡылымдың түбәндәге төркөмсәләре бар: исем ҡылым, уртаҡ ҡылым, сифат ҡылым.* Ж. Кейекбаев.

**ТӨРКӨН** *и. кар.* **түркен.**

**ТӨРКӨНСӘК** *с. кар.* **түркенсәк.**

**ТӨРКӘЙ** *и. кар.* **торҡа.**

**ТӨРЛӨ** *с.* **1.** Бер нисә төрҙә булған, күп төрҙәге. *Төрлө ағас. Төрлө ашамлыҡ. Төрлө йәнлек. Төрлө кеше. Төрлө сәскә. Төрлө тауыш. Төрлө төҫ. Төрлө уй. Төрлө һүҙ. // Тормошта төрлөһөн күреү—* ■ *Өҫтәлдең бер яҡ башында төрлө ҙурлыҡтағы көршәктәр, кәстрүлдәр ултыра.* Һ. Дәүләтшина. *Халыҡтары беҙҙең ватандың күп һанлы, төрлө-төрлө, берәүһе аҡ, береһе ҡара, берәүһе һары йөҙлө.* Р. Ниғмәти. *[Гәрәй:] Донъя өйрәтә ул, ҡустым, төрлөһөн өйрәтә.* Б. Бикбай.

**2.** Бер үк түгел, башҡа-башҡа, айырым-айырым. *Төрлө яҡҡа таралышыу.* ■ *Буҙәнәкәй тигән ай ялбыр ҡош йүгерә лә төрлө юл менән* (Халыҡ йырынан).

**3.** *бәйл. функцияһында* Төп килештәге исем, эйәлек килештәге алмаш менән килеп, сифат оҡшашлығын белдерә; кеүек. *Эт муйылы муйыл төрлө була.*

♦ **Башҡа** (*йәки* **икенсе) төрлө** бүтән рәүешле. *Новиков мәсьәләне бөтөнләй башҡа төрлө ҡуя.* Д. Юлтый. **Бер төрлө** 1) үҙ-ара оҡшаш, бер үк рәүешле. *Күңелем мең төрлөгә талпынғанда көнөм бер төрлөгә янам мин.* Ш. Бабич; 2) нимәләрҙер һәләт, сифаты тейешле кимәлдән ҡайтыш икәнен белдерә. *Аты бер төрлө генә. Һөйләшеүе бер төрлө генә күренә.* **Бер төрлө лә** һис бер, бер ниндәй ҙә. *Бер төрлө лә бәйләнеүсе булманы.* С. Агиш. *[Егет:] Миңә бер төрлө лә байлыҡ кәрәкмәй* (Әкиәттән). **Ни төрлө** ни рәүешле, нисек. *[Тимер:] Колхоз эше ни төрлөрәк бара?* Б. Бикбай. **Үҙенә бер төрлө** башҡаларҙан айырмалы, үҙенә генә хас. *Йәки бүлмәләрендә үҙенә башҡа, эш бүлмәләренә үҙенә айырым, залға тағы үҙенә хас, үҙенә бер төрлө гарнитур.* З. Биишева.

**ТӨРЛӨК** *и.* **1.** *һөйл.* Төрлө-төрлө төҫтәге тауар ҡырҡындылары. *Төрлөк йыйыу. Төрлөк ҡорау.*

**2.** Ҡатын-ҡыҙҙың күлдәк итәгенә баҫҡан төрлө төҫтәге таҫма. *Төрлөк баҫыу.* ■ *Ул [Зәлифә] әллә нисәмә ҡабат төрлөк тотҡан ҡыҙыл сатин күлдәк кейгән.* Һ. Дәүләтшина.

**ТӨРЛӨКЛӨ** *с.* Төрлөктән (1 мәғ.) ҡорап тегеүле. *Төрлөклө юрған.*

**ТӨРЛӨКЛӘҮ** *к.* Төрлөк (2 мәғ.) тотоу. *Күлдәкте төрлөкләп тегеү.*

**ТӨРЛӨЛӨК** *и.* Нимәнеңдер дә булһа формаһы, рәүеше, торошо һ. б. сифаттары яғынан төрлө булыу хәле. *Ашамлыҡтың төрлөлөгө.* ■ *Осло эшләпә йәки күләпәрә кейеп, аҡ сәкмәнгә төрөнөп килгән ҡаҙаҡ ҡарттары майҙандағы төрлөлөктө тағы тулыландырып тора.* К. Мәргән.

♦ **Бер төрлөлөк** бер үк нәмәнең үҙгәрешһеҙ гелән ҡабатланыу хәле. *Фатиманы ашханалағы аштарҙың бер төрлөлөгө йөҙәтте: кәбеҫтә һурпаһы ла тары өйрәһе, .. көн аша ҡабатланып ҡына тора.* Б. Бикбай.

**ТӨРЛӨЛӘНЕҮ** *к. кар.* **төрләнеү.**

**ТӨРЛӨСӘ** *р.* Төрлө тәүештә. *[Ямал:] Йырҙы уны төрлөсә йырлап була ул.* М. Тажи.

**ТӨРЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Төрлө (1 мәғ.) итеү. *Аҙыҡты төрләндереү.* ■ *Хайуандарҙы көрләндер, үләндәрҙе төрләндер, донъя йөҙөн нурландыр, яу, яу, ямғыр, яу, ямғыр!* Ш. Бабич.

**ТӨРЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Төрлөгә (1 мәғ.) әйләнеү, төрлө-төрлө булыу. *Утыҙынсы йылдарҙың аҙаҡтарына табан Сәғит Агиштың ижады тағы үҫә, тағы төрләнә төшә.* Ғ. Әбсәләмова. *Был хәбәрҙе ишеткәс, күңелдәрем төрләнде* (Бәйеттән). **Ҡырҡҡа** (*йәки* **бишкә) төрләнеү** бик күп төрлөгә үҙгәреү.

**2.** Нимәнеңдер күңелгә яткан төрөн теләп әҙләнеү; һайланыу. *Төрләнеп ултырмай, булғанын ашау.*

● *Бишектәге бала бишкә төрләнә.* Мәҡәл.

**ТӨРЛӘНСЕК** *с.* Төрләнергә, һайланырға яратыусан. *Төрләнсек кеше.*

**ТӨРЛӘҮ** *к.* Төрлө итеп әҙерләү (аш-һыуҙы). *Аш-һыу төрләүгә әүәҫ булыу.*

**ТӨРМӘ** [1] [*рус.* тюрьма] *и.* Тотҡондарҙы бикләп тота торған ҡарауыллы бина. *Төрмәгә ябыу. Төрмәлә ултырыу. Төрмәнән сығарыу.* ■ *Ҡоллоҡта, сыйырға сырмалып, зәһәрле төрмәләр ҡуйынында күп йылдар һыҡраған ас халыҡ.* Б. Ишемғол.

**ТӨРМӘ** [2] *и. диал.* Сүсбәрә.

**ТӨРМӘС** *с. диал.* Бөҙрә. *Төрмәс сәс.*

**ТӨРМӘСЕ** *и.* Төрмәлә эшләгән кеше, төрмә һаҡсыһы. *Хәмзә .. бер төн уртаһында фонары менән камераға инеп килгән төрмәсене һуғып йыға ла ҡасыу яғын ҡарай.* Ғ. Хәйри.

**ТӨРМӘСЛӘНЕҮ** *к. диал.* Бөҙрәләнеү. *Төрмәсләнеп торған сәс.*

**ТӨРМӘСЛӘҮ** *к. диал.* Бөҙрәләү. *Сәсте төрмәсләү.*

**ТӨРНӘК** *и. диал.* Төргәк. *Бер төрнәк тауар.*

**ТӨРНӘҮ** *к. диал.* Төрөү.

**ТӨРӨК** *и.* Төркиәнең төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (төрки телдәрҙең береһендә һөйләшә). *Төрөк ҡыҙы.*

**ТӨРӨКМӘН** *и.* Төркмән станың төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (төрки телдәрҙең береһендә һөйләшә). *Төрөкмән халҡы. Төрөкмән теле. Төрөкмән егете.*

**ТӨРӨКМӘНСӘ** *р.* **1.** Төрөкмән телендә. *Төрөкмәнсә уҡыу.*

**2.** Төрөкмәндәргә хас, төрөкмәндәр кеүек. *Төрөкмәнсә кейенеү.*

**ТӨРӨКСӘ** *р.* **1.** Төрөк телендә. *Төрөксә уҡый белеү.*

**2.** Төрөктәргә хас, төрөктәр кеүек. *Төрөксә бейеү. Төрөксә ултырыу.*

**ТӨРӨЛӨҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **төрөү.** *Сепрәккә төрөлгән нәмә.*

**2.** Бөҙрәләнеп уралыу. *Төрөлөп торған сәс.* ■ *Уның [атайымдың] эргәһенә ултырҙым да төрөпкәһенән төрөлөп-төрөлөп сыҡҡан төтөндәргә ҡараным.* Д. Юлтый.

**ТӨРӨНДӨРӨҮ** *ҡ.* **1.** Ян-яҡҡа ҡымтыидырыу; урандырыу. *Төрөндөрөп һалыу.* / Баштан аяҡ кейендереү. *Шау ебәккә төрөндөрөү.*

**2.** *күсм.* Ян-яҡтан ҡамалтыу; сумырыу. *Сәскәгә төрөндөрөү. Томанға төрөндөрөү.*

**ТӨРӨНӨҮ** *ҡ.* **1.** Ян-яҡтан урап ҡымтыныу; ураныу. *Төрөнөп ятыу. Юрғанға төрөнөү.* ■ *Һылыу ҡортҡа ебегән ҡуйтырына төрөнөп, һике ситенә генә килеп ултырҙы.* Т. Йәнәби. / Баштан-аяҡ кейенеү. *Шау ебәккә төрөнөү.*

**2.** *күсм.* Ян-яҡтан ҡамалыу; сумыу. *Томанға төрөнөү. Ҡараңғылыҡҡа төрөнөү. Моңға төрөнөү. Нурға төрөнөү. Сәскәгә төрөнөү.* ■ *Йәп-йәшел йәш үләнгә төрөнгән иң күркәм бер миҙгел ине.* М. Тажи.

**ТӨРӨПКӘ** [*рус.* трубка] *и.* Тәмәке һалып тарта торған соҡор башлы нәмә. *Төрөпкә тартыу.*

**ТӨРӨҮ** *ҡ.* **1.** Сепрәк, ҡағыҙ кеүек нәмәгә һалып, осон, башын ян-яҡлап ҡайтарыу; урау. *Баланы юрғанға төрөү. Китапты ҡағыҙға төрөү.* ■ *Батшаның оло килендәре сепрәккә таш төрөп алып, ҡайныларына алып барған* (Әкиәттән).

**2.** Ситен эскә ҡайтарып, оҙонға урау. *Балаҫты төрөү.* ■ *Ул [Сәгиҙә] стена газетаһын төрөп, шкафка һалды.* М. Тажи.

**3.** Осонан, ситенән бөкләп-бөкләп, үргә ҡайтарыу (ең, балаҡ һ. б. нәмәне). *Балаҡты төрөү. Еңде төрөү.* ■ *Шунда уҡ батыр Бабсаҡ йөрөп китте, ике итәген биленә төрөп китте.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

◆ **Ҡойроҡто төрөү** *шул уҡ* **ҡойроҡто һыртҡа һалыу** (*ҡар.* **ҡойроҡ**).

**ТӨРӨШӨҮ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **төрөү.**

**ТӨРПӨ**[1] *и.* **1.** Эре игәү, һабан игәүе.

**2.** *диал.* Тырнаҡ йышҡы (*ҡар.* **йышҡы**).

**ТӨРПӨ**[2] *с. диал.* Тупаҫ, ҡырыҫ. *Төрпө кеше. Төрпө һүҙле кеше.*

**ТӨРРӘ** *ҡыу.* Һарыҡты ҡыуалау һүҙе.

**ТӨРТКӨ**[1] *и.* **1.** Ҡәләм, перо, энә һ. б. нәмәнең осо менән тейгәндән ҡалған тамға, эҙ, бәләкәй генә түңәрәк тап; нөктә. *Ҡара төрткө. Төрткөлө пунктир.*

**2.** Берәй нәмә йөҙөндәге икенсе бер төҫтәге тап. *Ғәрифә инәй .. миңә зәңгәр төрткөлө ап-аҡ яулыҡ бөркәтте.* Ф. Рәхимғолова.

**3.** *һөйл.* Һөйләмдәрҙе айыра торған тыныш билдәһе (.), шулай уҡ һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартып яҙғанда ҡулланылған билдә, мәҫәлән: һ. б.; нөктә. *Төрткө ҡуйыу. Хәбәр һөйләм аҙағында төрткө ҡуйыла.*

**ТӨРТКӨ**[2] *и.* Ҡағыулы, һуғыулы ҡаты мөнәсәбәт. *[Мөхәмәт:] Ат өсөн типкеләнеүемә үкенмәйем, ят төрткөһөнә ҡалыуыма гәрләнәм.* Ә. Вахитов.

**ТӨРТКӨ**[3] *с. диал. ҡар.* **төртмә**[1]. *Төрткө тел. Төрткө таҡмаҡ.*

**ТӨРТКӨ**[4] *и. диал.* Һуҡыр сысҡан (*ҡар.* **сысҡан**). *Төрткө тиреһе.*

**ТӨРТКӨ**[5] *и. диал.* Түләмә. *Төрткө ауырыуы.*

**ТӨРТКӨЛӘҮ** *ҡ.* Ҡабат-ҡабат йәки төрлө урынға төртөү. *Бүрәнәләрҙе багор менән төрткөләп ағыҙғанда, ҡыуғынсы ҡайһы сакта яҙатайым һыуға төшөп, ағым та китә.* Ж. Кейекбаев.

**ТӨРТКӨЛӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **төрткөләү.** *Төрткөләшеп шаярыу.*

**ТӨРТКӨС**[1] *и. диал. ҡар.* **төртмә**[2].

**ТӨРТКӨС**[2] *и. диал.* Түләмә.

**ТӨРТКӨСЛӘҮ** *ҡ.* Ҡабат-ҡабат йәки төрлө урынға төртөү; төрткөләү. *[Миһран] багоры менән бүрәнәләргә йәбешкән боҙҙарҙы төрткөсләй.* М. Тажи.

**ТӨРТМӘ**[1] *с.* Кешенән көлөп, төрттөрөп алыуға йәтешле. *Төртмә йыр. Төртмә тел. Төртмә шиғыр.* ■ *Айсыуаҡтың төртмә һүҙҙе аңламауына Шаһиғәле кинәнеп көлдө.* Ш. Янбаев.

**ТӨРТМӘ**[2] *и.* Сөсө ҡамырҙан ҡалын итеп йәйеп, ҡаҙан төбөнә йәбештереп бешергән икмәк.

**ТӨРТМӘ**[3] *и. диал.* Төкәтмә.

**ТӨРТМӘЛЕ** *с. ҡар.* **төртмә**[1]. *Төртмәле һүҙ.*

**ТӨРТМӘЛӘҮ** *ҡ.* Төртмә һүҙҙәр әйтеү.

**ТӨРТМӘЛӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **төртмәләү.**

**ТӨРТМӘН** *с.* Төртөнөп, темеҫкенеп йөрөүсән. *Төртмән кеше.*

**ТӨРТӨК** *и. диал. ҡар.* **төрткө**[1].

**ТӨРТӨЛӨҮ** *ҡ.* **1.** Осло бер нәмәгә ҡаҙала барып тейеү. *Ҡаҙауға төртөлөү. Ботаҡҡа төртөлөү.* / Ҡаты бер нәмәгә барып бәрелеү; төкөлөү. *Саңғылар .. бер-береһенең өҫтөнә ятып барҙы ла, яр ситенә төртөлөп, айырылып ағып китте.* М. Тажи. *Халыҡ инә, сыға — иҫәбен алырға мөмкин түгел. Бер-беренә ҡағыла, төртөлә, ашыға.* С. Агиш. / *күсм.* Барып тейеү (һүҙгә ҡарата). *Күрәшсе, .. оялдымы, әллә карттың һүҙҙәре төртөлдөмө, өндәшмәй ситкә китте.* Б. Бикбай.

**2.** Бер сиккә, бер нәмәгә барып туҡтау; терәлеү. *Урамдың түбәнге осо .. урманға барып төртөлә.* Н. Мусин.

**3.** *күсм.* Хәл иткес бер нәмәгә терәлеп туҡтау (эш-хәлгә ҡарата). *Донъя бер Таллы МТС-ына ғына төртөлмәгән.* Ә. Вәли.

**4.** *күсм.* Эҙәрләп килгән ерҙән барып төкәлеү; терәлеү. *Һүҙҙең ҡайҙан сыҡҡанын тикшерһәләр, күбеһенең осо Юлдыбикә әбейгә барып төртөлә ине.* Т. Хәйбуллин.

**5.** *күсм.* Ярҙам һ. б. теләп яҡынлау; һыйыныу. *[Йыһангир:] Һеҙҙән башҡа барып төртөлөр урыным да, күҙ төбәр кешем дә юҡ.* Ш. Бикҡол.

**6.** *диал.* Дөмөгөү.

**ТӨРТӨНГӨС** *и. диал.* Ауылсы, мөстән.

**ТӨРТӨНӨҮ** *ҡ.* **1.** Тегендә-бында бәрелеү, һуғылыу. *[Фәрхиә:] Һуҡырым һаман юҡ та баһа, ҡайҙа төртөнөп йөрөй икән?* Х. Ғиләжев. | *күсм.* Ни ҙә булһа өмөт итеп, тегендә-бында эҙләнеү; темеҫкенеү. *«Төртөнөп, артист булам тип, ҡаланан ҡалаға йөрөйһөң!..» — тип [ҡатын] мине тетә башланы.* Ғ. Минһажев.

**2.** Бармаҡ менән маңлайға, түшкә, ике яурын-

ға төртөү; суҡыныу. *Михайло .. мөйөшкә ҡа-рап төртөнөп алғас, өҫтәл эргәһенә ултырҙы.* Б. Бикбай.

**ТӨРТӨҮ** *ҡ.* **1.** Ниҙеңдер осон бер нәмәгә тейҙереү. *Юлдыбикә әбей .. бармаҡ осон тәрил-кәләге майға төртөп алып, ҡашына һөрт[тө].* Т. Хәйбуллин. / Ниҙеңдер осон бер тарафҡа йүнәлтеү. *Төртөп күрһәтеү.* ■ *Капитан хатҡа төртөп: «Был һинең ҡулмы?» — тип миңә ҡа-раны.* Д. Юлтый.

**2.** Ҡәләм, бумала кеүек нәмәнең осон тей-ҙереп, бәләкәй генә тап төшөрөү. *Нөктә төртөү.*

**3.** Ниҙеңдер осо менән ҡапыл ҡағылыу. *Бөй-өргә төртөү. Ҡабырғаға төртөү. Таяҡ менән төртөү. Төртөп алыу. Төртөп уятыу. Йоҙроҡ менән төртөү.*

**4.** Көс менән үҙеңдән ситкә этеү. *Төртөп ауҙа-рыу. Төртөп ебәреү. Төртөп йығыу. Төртөп сы-ғарыу. Төртөп төшөрөү.* ■ *Биктимерҙең аты арый. Ул атын туҡтата ла, .. бер ярлауға төртөп осормаҡсы була* (Әкиәттән). / Этеп шыл-дырыу. *Ул .. һүрелеп барған күмер киҫәген мейес эсенә кире төртөп ҡуйҙы.* Б. Бикбай.

**5.** *күсм.* Эш, йомошто хәл иттереү өсөн аҫтыр-тын рәүештә бер нәмә биреү. *Аҡса төртөү.* ■ *Бер баҡыр төртһәң уға, тауҙай ҡараңды аҡлай ул.* Ш. Бабич.

**6.** *күсм. ҡар.* **төрттөрөү** 2. *Төртөп әйтеү.*

♦ **Баш төртөү** 1) башты терәү, башты һалыу. *Мендәргә баш төртөү.* ■ *— Йоҡоң килһә, бынау-ында башыңды төртөп тор.* Ф. Иҫәнғолов; 2) үҫенте биреү, шытыу. *Иҫке япраҡтар аҫтынан баш төртөп .. нәфис умырзаялар үҫеп сыҡҡан.* Ғ. Ибраһимов. **Күҙгә төртөп** *шул уҡ* **ике күҙен баҡтырып** (*ҡар.* **күҙ**). *Күҙгә төртөп әйтеү.* **Морон төртөү** *ҡар.* **морон. Төртөп сығыу** тишеп сығыу. *Ерҙе төртөп сығыу.* **Ут төртөү** *ҡар.* **ут.**

**ТӨРТӨШӨҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **төртөү** 1—5. *Үҙ--ара төртөшөү. Төртөшөп ултырыу.*

**ТӨРТТӨРӨҮ** *ҡ.* **1.** *йөкм. ҡар.* **төртөү** 1—5.

**2.** *күсм.* Кешенең берәй кәмселегенә, ҡылыҡ, тәртибенә, эшенә, һ. б. әсе, сәнскеле һүҙ менән ҡағылыу. *Төрттөрөп һөйләү. Төрттөрөп әйтеү.* ■ *Бер апай төрттөрә биреп: «Ҡаланан улар икмәктең ҡалай үҫкәнен ҡарарға килгән»,— тип ҡуйҙы.* Р. Солтангәрәев.

**ТӨРТӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Унда-бында төртөлөү. *Төртәләнеп атлау. Төртәләнеп йөрөү.*

**ТӨРҺӘЙЕҮ** *ҡ. диал.* Тырпайыу. *Төрһәйгән мыйыҡ.*

**ТӨРӘКӘЙЛӘҮ** *ҡ. диал.* Ҡораштырыу.

**ТӨРӘН** *и.* Һабандың кәҫте аҫтан ҡыр-ҡып, әйләндереп һала торған өлөшө. *Ике төрән-ле һабан.* ■ *Тракторҙар дүртәр төрәнле һабан менән сиҙәмде актара.* А. Карнай.

**ТӨС-ТӨС** *ҡыу.* Атты, дөйәне етеҙләп ҡыуған-да әйтелә. *Алдан килгән сал һаҡаллы ҡаҙаҡ, төс-төс тип, дөйәһен ҡыҫтай.* Ғ. Ғүмәр.

**ТӨҪ** *и.* **1.** Есемдәрҙең сағылған йәки тарал-ған нурҙы спектраль составҡа ярашлы күреү тойғоһо тыуҙыра торған үҙлеге. *Аҡ төҫ. Буҙ төҫ. Бурлат төҫ. Көрән төҫ. Күк төҫ. Ҡара төҫ. Ҡуңыр төҫ. Ҡыҙыл төҫ. Лимон төҫө. Һандал төҫ. Һары төҫ.* ■ *Арыштар ҙа баш ҡоҫҡан мәлендәге ҡаракүскыл йәшеллеген юғалтып, һарғылт көкөрт төҫкә әйләнеп, ем йыйып ултыра.* Ғ. Дәүләтшин. *Арҡа ғына ерҙең ай боланы — йәй булдиһә, төҫө һор була* (Халыҡ йырынан).

**2.** Дөйөм күренеш, рәүеш. *Иҫтәремдән сыҡ-май Уралҡайым, шишмәләре, сахра, туғайы, йәннәт төҫөн биргән сәскәләре, һандуғастай моңло ҡурайы.* Салауат Юлаев. / Күренеште би-ҙәп торған сифат; йәм, күрк. *Әлек ара-тирә ултырған бер нисә ҡалай түбәле йорт, ҡуҡҡа күтәрелгән мәсет манараһы ғына ауылға бер ни кәҙәр төҫ бирә ине.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 23 ноябрь. / Ниндәйҙер сифат йәки рәүеш биргән һыҙат. *Политик төҫ.* ■ *Уйнап-көлөп һөйләнгән был хәбәрҙең ысын төҫ алып китеүенә Гөлйөҙөмдөң ышанғыһы килмәне.* Һ. Дәүләтшина. *Һөйләшеүҙәр эшлекле төҫ алды.* Б. Бикбай.

**3.** Тышҡы ҡиәфәт; һын, һүрәт. *[Тайба:] Үтә лә ябыҡ, үтә лә йонсоу инең. Әле инде, аллаға шөкөр, бөтөнләй элекке төҫөңә ҡайта яҙҙың.* З. Биишева. **Төҫ алыу** яҡшы төҫ, ҡиәфәткә инеү. *Әхмәҙиҙен аты яҙ башынан уҡ күтәртә башлай, күк үләнгә аяҡ баҫмайынса төҫ алмай.* Ж. Кейекбаев. **Төҫ биреү** яҡшы төҫ, ҡиәфәт биреү; килешеү. *Кейәүгә сығыу Мәхмүзәгә төҫ биргәндер ахыры, матурланыбыраҡ, түңәрәк-ләнеберәк киткән кеүек күренә.* Д. Исламов. **Төҫ ташлау** яҡшы төҫ, ҡиәфәтте юғалтыу.

**4.** Сырай, йөҙ. *Асыулы төҫ. Борсоуло төҫ. Етди төҫ. Инсафлы төҫ. Йоҡомһораған төҫ. Ҡәнәғәт төҫ. Олпат төҫ. Тыныс төҫ. Шат төҫ. Төҫкә йәш кеше. Төҫкә матур бала. Төҫкә сыҡҡан ҡыйыулыҡ. Төҫ касыу. Төҫ ташлау. Төҫ һаҡлау.* ■ *Булаттың төҫө ҡапыл үҙгәреп китте: ҡаштары емерелде, ҡара күҙҙәре ҡыҫыла төштө, йөҙөндәге ваҡ ҡына һипкелдәре лә ку-бәйгән кеүек булды.* Ш. Насыров. *[Өмәт] бер ваҡытта ла күргән ауырлығын төҫөнә сығар-май. Күп ваҡыт уның асыуын да, шатлығын да белеп булмай.* Д. Юлтый.

**5.** Айырым шәхесте билдәләгән бер сифат. *Миңлеғәли исеменә ағас ултыртырға булды ла, был ағасҡа улымдың төҫө итеп ҡарармын, тип уйланы ҡарт.* Р. Солтангәрәев. *Көмөш кенә һаплы булат ҡылыс Ҡаһым түрә аҫҡан биленә, булат ҡына ҡылысын төҫө итеп алып ҡайтайыҡ-сы иленә* (Халыҡ йырынан).

**6.** Ниҙеңдер билдәһе, эҙе, эҫәре. *Алма төҫө күрмәү. Йоҡо төҫө күрмәү.* ■ *Йыйылыштың еҫе лә, төҫө лә ҡалманы. Халыҡ ягаға килеп, һуғышырға тотондо.* И. Насыри. *[Ынйыкай:] Төҫкә-башҡа ла арыу ғынаһың да ни... Бәхетең генә юҡ шул, кейәү төҫө күрмәй ҡартайып киләһең.* Ш. Бикҡол.

**7.** *күсм.* Кемдеңдер тәбиғәтенә килешле си-фат. *[Салих:] Һиңә, ауыл ҡыҙына, академия төҫмө һуң ул? Күптән ауылда кейәүгә сығып, бала үҫтереп.. ятыр инең.* Б. Ишемғол. *Саптар менән яуға сабыу ир-егеткә төҫ икән.* Ә. Вахи-тов.

**8.** *күсм.* Нимәгәлер бер күренеш биргән сифат. *Көн болотланы... Көндөң төҫө боҙолоуы ылауҙағыларға ла йоҡто.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТӨҪ-БАШ** *и. йыйн.* Бөтә булған тышҡы ҡиәфәт. *Аҙнағолдоң буй-һыны, төҫө-башы .. Ир-*

*йегеттең йәш сағына окшап тор[а].* З. Биишева. *Төçкә-башка малай ғына күренгән бер һалдат килеп инде.* Ә. Вахитов.

**ТӨҪЛӨ**[1] *с.* **1.** Төрлө төçтәге, төрлө төçкә буяулы. *Төçлө кәләмдәр.* ■ *Гөлдөң һауыты бәләкәс биҙрә, уны Сабира төçлө кағыҙҙар менән коршатып куйған.* Ғ. Хәйри.

**2.** Ниндәй ҙә булһа бер рәүешле. *Бүтән төçлө. Икенсе төçлө.* ■ *Район үҙәге .. гел бер төçлө вак кына ағас йорттарҙан тора.* М. Тажи. *Юк, мин Әмирхановты был төçлө булыр тип һис уйыма килтермәгәйнем.* С. Агиш.

**ТӨҪЛӨ**[2] *бәйл.* **1.** Төп килештәге исем, эйәлек килештәге алмаш менән килеп, сифат окшашлығын белдерә; кеүек, һымак, шикелле. Арыçлан төçлө кыйыу. Күгәрсен төçлө гөрләү. ■ *Тимашев бик йәш, кыҙҙар төçлө бер малай.* Д. Юлтый. *Сәскә төçлө йырҙарымды йырла йым заукым өсөн, йырлайым тик сәскәләй кыҙҙарға бай халкым өсөн.* Ш. Бабич. / Айырымланған окшатыу һәм сағыштырыу бәйләнештәрендә кулланыла; кеүек, һымак, шикелле. *Семафорҙарҙың йәшел, кыҙыл уттары, төң ябалағының күҙе төçлө, селт-селт килеп, бер асылып, бер йомолоп тора.* М. Тажи. / Окшатыу һәм сағыштырыу һөйләмдәрендә хәбәр функцияһын үтәй; кеүек, һымак. *Куҙҙе асам. Элеге ак туңәрәк әйләнә лә, киңәйә. Үҙе матур түçлө.* С. Агиш. *Сәриә һис кенә лә ауылдан киткән төçлө түгел.* Я. Хамматов.

**2.** Шартлы фараз төшөнсәһе биреү өсөн кулланыла; кеүек, һымак. *Барып булмаç төçлө. Уйлағанса булыр төçлө.* ■ *Һәр шартлаған бомба .. беҙҙең блиндажға төшөр төçлө.* Д. Юлтый. *Хистәрем дә бүлмәләргә һыймай, кукрәк тә тар төçлө йөрәккә.* М. Хәй.

**ТӨҪМӨР** *и.* Берәй нәмәнең сак кына айырылған бер төрө. *Һуҙҙең мәғәнә төçмөрө.*

**ТӨҪМӨРЛӨ** *с. диал.* Һылыу, матур. *Төçмөрлө ат. Төçмөрлө кыҙ.*

**ТӨҪМӨРЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Әҙ генә беленеү, сак кына күренеү. *Урыны-урыны менән шаҙра кар аçтынан сана эҙе төçмөрләнеп килгән кеүек.* Ғ. Шәрипов.

**2.** Берәй төрлө билдәләнеү, характерланыу. *Р. Нигмәтиҙең үҙенә генә хас стиле, поэтик алымдары якшы ук төçмөрләнә.* Ғ. Хөсәйенов.

**3.** *диал.* Һылыуланыу, матурланыу.

**ТӨҪМӨРЛӘҮ** *к.* **1.** Төçөнә, киәфәтенә карап, таныған кеүек итеү; сырамытыу. *Йәштәр бик үҙгәргән, уларҙы ата-әсәләренә, ағалары, апаларына окшатып кына, төçмөрләп кенә танырға мөмкин.* С. Агиш.

**2.** Ниндәйҙер билдәһенә карап, сак кына күреү. *Таң һарыһында алғы һыҙык ныгытмаларын төçмөрләй алдык.* Д. Юлтый. / Ниндәйҙер һыҙаты буйынса бер аҙ билдәләү. *Беҙ уларҙан [картиналарҙан] бөгөн дә утыҙынсы йылдар романтикаһын, шул осор һулышын төçмөрләйбеҙ.* Ә. Сөләймәнов. *Прозабыҙҙың заман темаһын, замандаш образын ихлас төçмәрләй башлауы уны төрлө характер менән байытты.* З. Нурғәлин.

**ТӨҪҺӨҘ** *с.* **1.** Үҙенә башка бер төçө, буяуы юк. *Төçһөҙ газ. Төçһөҙ шыйыклык.*

**2.** *күсм.* Якты, асык һыҙаттарҙан мәхрүм; мәғәнәһеҙ. *Ярты быуат ғүмер ителгән, ә артка боролоп караһаң, [Шәүәлиҙең] тулы мәғәнәле бер көн дә юк — гел алдашыу, бары үҙ рәхәте өсөн йәшәлгән төçһөҙ ғүмер.* Б. Бикбай.

**ТӨҪҺӨҘЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Төçһөҙ (1 мәғ.) итеү, төçһөҙгә әйләндереү. *Шыйыклыкты төçһөҙләндереү.*

**ТӨҪҺӨҘЛӘНЕҮ** *к.* Төçһөҙ (1 мәғ.) булыу, төçһөҙгә әйләнеү. *Нәфисә хәлһеҙләнде. .. Күҙе алдына бөтә нәмә төçһөҙләнә башлаған кеүек булды.* Я. Хамматов. / Төç касыу, ағарыныу (йөҙгә карата). *Ерҙә яткан кулагә шикелле төçһөҙләнде Сәйҙел йөҙҙәре.* Ғ. Сәләм.

**ТӨҪ-ҺЫН** *и. йыйн.* Тышкы киәфәт. *„Нурғәли коҙаның Мохтары тип торам. Калай төçһыны Мохтар коҙаға окшап тора»,— тине әбей.* С. Кулибай.

**ТӨҪӘҮЕЛЛӘҮ** *к. диал.* Тоçмаллау.

**ТӨТКӘҮ** *к. диал.* Түҙеү, сыҙау. *Бала-сағаға кейем төткәмәй.*

**ТӨТӨМ** *и. диал.* Түҙем, сыҙам.

**ТӨТӨМЛӨ** *с. диал.* **1.** Түҙемле, сыҙамлы. *Төтөмлө кеше.*

**2.** Бәрәкәтле. *Төтөмлө сәй.*

**ТӨТӨМҺӨҘ** *с. диал.* **1.** Түҙемһеҙ, сыҙамһыҙ. *Төтөһмһөҙ бала.*

**2.** Бәрәкәтһеҙ. *Төтөмһөҙ бесән.*

**ТӨТӨН** *и.* Ниҙер янғанда бүленеп сыккан күк, кара томан. *Дары төтөнө. Тәмәке төтөнө. Куйы төтөн. Әсе төтөн.* ■ *Усактан борлап сыккан куйы күк төтөн .. нәҙек оҙон бағана һымак юғары үрләне.* Һ. Дәүләтшина.

◆ **Төтөнө башка** ике нәмәне сағыштырғанда якшырағына карата әйтелә. *Был балтаның төтөнө башка.* **Төтөн сығарыу** көн күреү, йәшәү. **Эт күҙе төтөн белмәç** *кар.* **эт.**

**ТӨТӨНЛӨ** *с.* Төтөн менән тулған, төтөнгә тулған. *Төтөнлө бүлмә.* ■ *[Сурағол — старшинаға:] Ни өсөн минең бисәм менән улымды төтөнлө мунсаға бикләп, сәсәтеп, тонсоктороп үлтерҙең?* Т. Хәйбуллин.

**ТӨТӨНЛӨК** *и.* **1.** Себен, серәкәйҙән, кыраулан һаклау өсөн нык төтәтеп һалған нәмә. *Төтөнлөк һалыу.* ■ *Малды себен, серәкәй йонсоткан йәйге эçелә [Исхак] урмандан сөрөк түмгәктәр алып кайта, бер нисә урында төтөнлөк быçкытып ебәрә ине.* Ш. Янбаев.

**2.** *диал.* Төтәткес.

**ТӨТӨНЛӘҮ** *к.* **1.** *һир.* Төтөнлө итеү; төтәтеү. *Бүлмәне төтөнләү.*

**2.** *диал. кар.* **төтәү** 1—2.

**ТӨТӨНҺӨҘ** *с.* Янғанда төтөн бүлеп сығармай торған. *Төтөнһөҙ дары.*

**ТӨТӨНӘК** *и. диал.* Төтәткес.

**ТӨТӨҮ** *к. диал.* Түҙеү, сыҙау. *Мал себенгә төтмәй. балаға кейем төтмәй.*

**ТӨТӘНӘК** *и. диал.* **1.** Һукыр шәм (*кар.* **шәм**).

**2.** *кар.* **төтөнлөк** 1.

**ТӨТӘҪЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **төтәçләү**. *[Тимер мейес төтөнөнә] өй стенаһының йышылмаған, балта менән генә юнылған бүрәнәләре һәм түшәм такталары төтәçләнгән, каралған.* Ғ. Хәйри.

**ТӨТӘҪЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **төтәçләү**.

**ТӨТӘҪЛӘҮ** *к.* **1.** Төтөн менән ыҫлау, төтөн бөркөү. *Умарта кортон төтәҫләү.* ■ *[Заһир:] Өңөңдән төтәҫләп сығарырмын мин һине.* М. Кәрим.

**2.** *күсм.* Нык итеп орошоу; быжғыртыу. *Фәүзиә бойокто. Бының сәбәбен аңлап торған Шәмсениса инәй Айсыуакты төтәҫләне: «Әҙәмдең аяулы балаһын рәнйетһәң, бәддоға укырмын мин һиңә..»,— тип киҫәтте.* Т. Килмөхәмәтов.

**ТӨТӘТЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **төтәтеү.**

**ТӨТӘТЕҮ** *к.* **1.** Ниҙәндер төтөнөн сығарыу. *Артыш төтәтеү.* ■ *Тауға кыялатып һалынған юлдан зәңгәр мотоциклын төтәтә-төтәтә, кемдер менеп килә.* Р. Солтангәрәев. / Төтөн сығарып, тартыу (тәмәкене). *Тәмәке төтәтеү.* ■ *[Закир:] Минең аштан һуң аҙ ғыны төтәтеп ала торған ғәҙәт бар шул инде.* З. Бнишева.

**2.** Төтөнләгә әйләндереү, төтөнлө итеү. *Бүлмәне төтәтеү.*

**3.** *күсм.* Бик ҙур тиҙлек менән хәрәкәт итеү. *Төтәтә һуғып килеп етеү. Төтәтеп сығып китеү.*

**ТӨТӘТКЕС** *и.* Умарта карағанда корттарға төтөн өрҙөрә торған нәмә. *Төтәткескә һалып яндырыр өсөн сөрөктө алдан әҙерләргә кәрәк. Ул коро булырға тейеш.* «Совет Башкортостаны», 1986, 10 июнь.

**ТӨТӘҮ** *к.* **1.** Төтөн сығарыу, төтөн бөркөү. *Мейес төтәй.* ■ *Бер пароход төтәй-төтәй Агиҙелдә тулкын яра.* М. Кәрим.

**2.** Төтөн йәки томан кеүек нәмә каплап, күтәрелеү, йәйелеү. *Кискә карай ел көсәйҙе. Әлегә саклы ер өҫтөнән генә һеперткән буран убаларҙы төтәй башланы... Күп тә үтмәне, буран купты.* Ә. Вәли.

**3.** *күсм.* Бик ҙур тиҙлек менән хәрәкәт итеү. *Төтәп сығып китеү. Төтәп килеп етеү.*

**ТӨҺМӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Шик, шөбһә. *[Юлдыбикә:] Башка бераү булһа, икеләнеп, төһмәт менән карар инең. Юлдыбикәнең юлы уңмағаны ... бармы?* Т. Хәйбуллин.

□ **Төһмәт итеү** шиккә алыу, шикләнеү. *«Әллә бераүһе ошаклап та өлгөрҙөмө, әллә былай ғына төһмәт итәләрме?» — тип уйлап куйҙы [Сәғди].* Һ. Дәүләтшина.

**ТӨШ** [1] *и.* Йокола күргән төрлө күренеш. *Төш күреү. Төштө юрау.* ■ *[Рәхимә — Булатка:] Бөгөн һине төшөмдә күрҙемсе, .. төш булғас, төш: һин егет булып еткәнһең имеш, тим.* К. Кинйәбулатова. *Гөлсөм, ниндәйҙер яман төш күреп, кыскырып уянды. Һикереп тороп, якңағына карапып алды.* Я. Вәлиев. *Төштәремдә күреп ай кыуанам, һуҙ әйтәйем тиһәм, уянам* (Халык йырынан). **Төш болары** насар төш күреү. *[Сәйҙеямал:] Балама бер-бер хәл булды микән әллә? Ошо арала йөрәгем сығып бара, төшөм болара.* Я. Хамматов.

♦ **Ике** (*йәки* **ете**) **ятып, бер төшкә инмәү** уйға ла инеп сыкмау, иҫкә лә төшмәү. *Ете ятып бер төшөмә инмәгән кеше тотһон да: «Коҙа»,— тип килеп күрешһен әле.* Н. Кәрип.

● *Тауык төшөнә тары инә.* Мәкәл. *Үткән эштән төш якшы.* Әйтем.

**ТӨШ** [2] *и.* Кояштың туп-тура көньякта булған вакыты, көн уҙәге. *Төш вакыты. Төшкә тиклем. Төштән һуң. Төш алды. Төш ауыу. Төш етеү.* ■ *Иртәнсәк буранлап, һыуытыбырак торған көн төшкә табан капыл йылытты.* Я. Хамматов. **Бала төш** төш етерҙән бер ике сәғәт алдағы вакыт. Төш яғы *һөйл.* көньяк.

**ТӨШ** [3] *и. диал.* Һөйәк.

**ТӨШ** [4] *и. диал. кар.* **тош** [1].

**ТӨШКӨ** *с.* Төш вакытындағы. *Төшкө сәй. Төшкө һауын. Төшкө эҫелек. Төшкө ял. // Тамамланды ярты эш көнө, мин ашарға кайтам төшкөнө.* Р. Ғарипов.

**ТӨШКӨЛӨК** *и.* Төшкө аш. *Төшкөлөктө ашау.* ■ *[Оҫтабикә:] Мин һиңә төшкөлөккә тауык бешереп илтермен* (Әкиәттән).

**ТӨШЛӨК** *и.* **1.** Кояштың иң юғары күтәрелгән нөктәһе. *Төшлөккә етеп, тап түбә өҫтөнән кыҙҙара башлаған кояш хәлде .. ала башланы.* З. Биишева. *Кояш төшлөктән бер аҙ ғына ауа башлагас та.. халык волость йортона карай ағыла башланы.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *һөйл.* Төньякка каршы тараф; көньяк. // *Төшлөк як.* ■ *Төшлөктә Өршәк тирәктәре күгәреп монарлана. Төньякта Опто йүкәлектәре кускыллаңып йәйелеп ята.* С. Кудаш. *Төшлөккә әйләнгән айҙың тулы яктыһы кыуыш ишегенән инеп, иҙәнен каплап алғайны.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Төш вакыты. *Төшлөк үткәс, бутка бешкәс, кыҙ-егеттәр кайтты.* Ш. Бабич.

**4.** *диал.* Төшкөлөк.

**ТӨШЛӘНЕҮ** *к. диал.* Төшкөлөккә ашау.

**ТӨШӨМ** [1] *и.* **1.** Билдәле бер майҙандан сыккан иген микдары. *Игендең төшөмө.* ■ *[Динисламов:] Арыш еме тос булһа ла, төшөмө түбән, Ғәзиз ағай.* И. Ниғмәтуллин. / Билдәле майҙандан алынған бесән, һалам микдары. *Быйыл бесәндең төшөмө якшы.*

**2.** Кулға төшкән табыш; килем.

**ТӨШӨМ** [2]: **төшөм килеш** кемде?, нимәне? һорауына яуап биргән килеш. **Төшөм йүнәлеше** эш-хәрәкәттең нимәгәләр йүнәлгәнен белдергән кылым категорияһы.

**ТӨШӨМЛӨ** *с.* **1.** Төшөмө мул, күп. *Агас башындағы кар киләһе йылдағы ... игендәрҙең төшөмлө буласағын күрһәтә.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Төшөм, килемде күп бирә торған; килемле. *Төшөмлө эш.* ■ *[Фәрхетдин:] Ә минең бер үҙемде «Төшөмлө урын эҙләүсе Фәрхетдин» тип, газетаға төшөрөп куйғандар.* М. Хәйҙәров.

**ТӨШӨНДӨРӨҮ** *к.* **1.** Ниҙәндер асылын, мәғәнәһен сисеү; аңлатыу. *Төшөндөрөп биреү. Мәсьәләне төшөндөрөү. Эште төшөндөрөү.*

**2.** Нимәгәләр аңды, фекерҙе асыу; өйрәтеү. — *Һине мин шундай бер акыл эйәһе менән таныштырырмын. Ул һинең бөтә һорауыңа яуап бирер, күп нәмәгә төшөндөрөр.* Һ. Дәүләтшина.

**ТӨШӨНКӨ** *с.* **1.** Тейешле кимәлдән бер аҙ түбән. *Ғарифтың .. яурын баштары бер аҙ төшөнкө, итәктәре бер аҙ һалпырак булып тора ине.* М. Ғафури.

**2.** Ғәҙәттәге кимәлдән кәм. *[Ныязғол:] Быйыл Яйыкка бер-ике көтөү мал кыуырға кәрәк. Хакы төшөнкө тип, унса көтөүҙе һатмай, кайҙа куяһың.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *күсм.* Күңелһеҙлек, бойоклок менән һуғарылған. *Төшөнкө күңел. Төшөнкө тауыш.*

■ *Бахыр, Сәгиҙәгә бик ауыр бит, күңеле бик төшөнкө шул. Зыя өсөн уғата ла ҡайғыра.* М. Тажи.

**ТӨШӨНКӨЛӨК** *и.* Бойоҡлоҡ, күңелһеҙлек. *Күңел төшөнкөлөгө.* ■ *Ауырлыҡтар, ҡыйынлыҡтар аҫтында ҡалһа ла, күңелһеҙлеккә, төшөнкөлөккә бирелергә тейеш түгел кеше.* Ш. Шәһәр.

**ТӨШӨНӨКЛӨ** *с.* Асылы, мәғәнәһе аңлайышлы. *Төшөнөклө китап. Төшөнөклө итеп һөйләү.*

**ТӨШӨНӨКҺӨҘ** *с.* Асылы, мәғәнәһе аңлашылмаған; аңлайышһыҙ. *Төшөнөкһөҙ китап. // Төшөнөкһөҙ һөйләү.*

**ТӨШӨНӨҮ** *к.* **1.** Нимәнеңдер асылын, мәғәнәһен аңлау, ҡабул итеү. *Мәсьәләне төшөнөү. Әйткәнде төшөнөү.* ■ *Төшөндөм мин тәрән мәғәнәһен ҡабатланмаҫ яҡты ғүмерҙең.* Х. Ҡунаҡбай.

**2.** Нимәгәлер аң, фекер менән етеү. *Ниҙеңдер айышына, асылына төшөнөү. Эшкә төшөнөү.* ■ *Был хәлгә бик оҙаҡ төшөнә алмай йөҙәп бөттөм.* С. Агиш.

**ТӨШӨНСӘ** *и.* **1.** Ниҙеңдер төп билдәһен сағылдырған логик фекер. *Һүҙ төшөнсәһе.* ■ *Шиғыр китабы циклдан йөкмәткеһе һәм формаһы менән киңерәк төшөнсә.* Ә. Вахитов.

**2.** Ниҙер хаҡындағы мәғлүмәт, белем. *Балалар башланғыс кластарҙа ... тәбиғәт, йәмғиәт, хеҙмәт тураһында тәүге фәнни төшөнсә ала.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1965, № 1.

**ТӨШӨРГӨС** *и.* Йәбештереп һүрәтен төшөрә торған елемле ҡағыҙ.

**ТӨШӨРМӘ** *и.* Төп текстың бит аҫтына төшөрөп биргән өҫтәмә яҙыу. *Төшөрмә биреү.*

**ТӨШӨРӨЛӨҮ** *к. төш. кар.* **төшөрөү** 1—5, 12—19, 21—26. *Аҙарып төшөрөү. Сәскә төшөрөлгән көршәк.* ■ *Ул [тоҡтон] ҡулдарын көскә ҡуҙғатып, һыу һорап һондо. Ләкин ул ҡулдар исправник тарафынан тибеп төшөрөлдө.* Т. Хәйбуллин. *Төктәрҙе алып киттеләр. Мин ныҡ ҡына ҡараным: береһенә ҡыҙыл ерлеккә зәңгәр биҙәктәр төшөрөлгән.* С. Агиш. *Уртаға кем төшөрөлһә, [таҡмаҡта] шуға ҡыйлатып характеристика бирерлек йыр һайлана.* К. Әхмәтйәнов.

**ТӨШӨРӨҮ** *к.* **1.** Юғарынан йәки ниҙеңдер өҫтөнән аҫҡа, түбәнгә күсереп, урынын алмаштырыу. *Арбанан төшөрөү. Баланы ҡулдан төшөрөү.* ■ *Һалдаттар асыҡты... Аптырағас, яңы ғына йомарланған, бешеп етмәгән алмаларҙы, грушаларҙы төшөрөп ашайҙар.* Д. Юлтый. / Ниҙең дә булһа түбәнгә ҡуйылмалы осон аҫҡа, түбәнгә күсереү. *Баҫҡысты баҙға төшөрөү.* ■ *Ул [Сәмиғуллин] ... ауыр ломды өҫкә ныҡ күтәреп, ҡалын, быҫраҡ боҙға көс менән төшөрә.* Ә. Вәли. *Арҡан осона таш бәйләп, төшөрөп ҡарағандар. Арҡандың осо төпкә барып еткән, ти* (Әкиәттән). / Үргә беркетеп ҡуйған осон, яғын аҫҡа табан ебәреү. *[Гөлйөҙөм] урталағы ҡыҙыл шаршауҙы төшөрөп, мейес артына сыҡты.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Аҫҡараҡ күсереү, түбәнерәк торош биреү. *Мылтыҡты йәплӛй башланым. Һис булдырып булмай: өҫкәрәк күтәрһәң, ырғағына бармаҡ етмәй, түбәнерәк төшөрһәң, мушка аша тоҫҡап булмай.* Ә. Зәйнуллин. / Торған еренән аҫҡа шыуҙырыу. *Ойоҡтоң ҡунысын төшөрөү. Салбарҙың төрөлгән балағын төшөрөү.*

**3.** Аҫҡа табан йүнәлтеп, берәй ергә ултыртыу. *Самолётты аэродромға төшөрөү.*

**4.** Ниҙеңдер эсенә һалыу, урынлаштырыу; индереү. *Ваҡ аксаны телефон-автоматҡа төшөрөү. Табутты кәбергә төшөрөү. Хатты почта йәшнигенә төшөрөү.* ■ *Бына һыуға кәмә төшөрҙөләр.* З. Биишева.

**5.** Һыу ағымы ыңғайына йәки тау юлы менән түбәнгә табан алып барыу. *Һал менән бурәнәне төшөрөү.* ■ — *Ҡолбаҡтыға утын төшөрөргә кәрәк, исмаһам, берәр ярты бот алып булмаҫмы?* Т. Хәйбуллин.

**6.** Берәй станцияла, туҡталышта һ. б. транспорттан сығарыу. *Троллейбустан пассажирҙарҙы төшөрөү.* ■ *Көн ярымлыҡ юлды бер аҙнаға һуҙып, .. Өфөгә лә килеп индек. Сөнки станция һайын төшөрөп ҡалдыралар һәм беҙгә икенсе поезды оҙаҡ көтөргә тура килә ине.* С. Агиш.

**7.** Ниндәйҙер юлға, урынға йүнәлтеү. *Алға төшөрөп атлатыу.* ■ *Мөлөк карт боролоп, [юлсының] эргәһенә килде лә, .. Күсейгә бара торған юлға төшөрөп ебәрҙе.* Т. Хәйбуллин.

**8.** Абайламаҫтан ҡулдан ысҡындырыу. *Ручканы төшөрөп ҡалдырыу.* ■ — *Йөҙө ҡара Нәсимә ни, ҡабаланып килеп, .. ташҡа һөрөндө лә табаны төшөрөп ярып ҡуйҙы.* Ғ. Дәүләтшин.

**9.** Һауанан һ. б. йүнәлтеп, нимәгәлер яҡтыртыу. *Күләгә төшөрөү. Ҡояш нуры төшөрөү. Яҡтылыҡ төшөрөү.* / *күсм.* Ҡапыл йөрәккә, күңелгә берәй тойғо һалыу, урынлаштырыу. *Йөрәккә ҡурҡыу төшөрөү. Күңелгә шик төшөрөү.*

**10.** Йоҙроҡ йәки башҡа нәмә менән тәнгә һ. б. ергә һуғыу, эләктереү. *Яңаҡҡа берҙе төшөрөү.* ■ *Ҡуҙыйкүрпәс, тирә-йүндә бер нәмә лә күренмәгәс, атының былай ҡотороуына ғәжәпләнеп, уға бер-ике ҡамсы төшөрөп, уҙ юлына китә.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». / Кем йәки ниҙеңдер өҫтөнә йөк итеү, өлөшөнә ҡалдырыу. *Эштең күбен йәштәргә төшөрөү. Эштәге бөтә ауырлыҡты машинаға төшөрөү.*

**11.** Ниҙең дә булһа көсөн, күләмен һ. б. əҙәйтеү; йомшартыу, кәметеү. *Газдың баҫымын төшөрөү. Көсөргәнешлекте төшөрөү. Һыуҙың кимәлен төшөрөү.* / Бушаҡ итеү, бушағайтыу. *Арҡалыҡты төшөрөү.* / Һирәгерәк итеү (пульсты). *Пульсты төшөрөү.* / Кимәл, дәрәжә йәһәтенән түбәнерәк итеү. *Әйбергә хаҡты төшөрөү.* / Абруй, дәрәжә йәһәтенән түбәнерәк итеү. *Абруйҙы төшөрөү. Дәрәжәне төшөрөү.* ■ *Балалар араһында уның [Ҡунаҡкол карттың] баҙары бик ҙур. Үҙе лә быны һиҙә һәм мөмкин тиклем улар алдында бәйәһен төшөрмәҫкә тырыша.* К. Мәргән. / *күсм.* Бошонҡо, төшөнкө хәлгә ҡалдырыу, килтереү. *Күңелде төшөрөү. Кәйефте төшөрөү. Рухты төшөрөү.*

**12.** Етлекмәҫ борон, көн элгәре үле тыуҙырыу. *Ауырҙы төшөрөү.* ■ — *Баллы ауылының Орҡоя тигән бер һалдатҡа ла, шулай ире юҡта йөккә ҡалып, уны төшөрәм тип, мышаяҡ эскән дә бахырың бөтә тәне ҡара янып барып үлгән, ти.* Һ. Дәүләтшина.

**13.** Ниҙелер болғап, яҙып, бүлеп сығарыу, айырып алыу. *Май төшөрөү.*

**14.** Ваҡытлыса тороу йәки ҡунып сығыу өсөн урынлаштырыу, индереү. *Квартираға төшөрөү.* ■ *— Тәнзилә ҡәйенбикә,— тине ҡарт,— быйыл ауылға уҡытыусы алып ҡайттым. Ҡыҙымды һиңә төшөрөргә булдым инде. Өйөң иркен, үҙеңә иптәш тә булыр.* М. Тажи.

**15.** Ғаиләгә, кейәү төйәгенә ҡатын итеп килтереү. *Килен төшөрөү.* ■ *Исхаҡ кәләше Зәлифә бында тормаймы ни? — Юҡ әле. Исхаҡ үҙе киленде төшөрөп өлгөрмәне, һуғышҡа китте.* Һ. Дәүләтшина.

**16.** Ниндәйҙер хәлгә ҡалдырыу, килтереү. *Бәләгә төшөрөү. Атты аҡ күбеккә төшөрөү. Көлкө хәлгә төшөрөү. Ҡайғыға төшөрөү. Ҡара тиргә төшөрөү. Өмөтһеҙлеккә төшөрөү.*

**17.** Ниндәйҙер эшкә ҡушыу, тотондороу, башлатыу. *Ныяҙғолдоң игене ни донъя ерен ябып ята әле. Анау Ҡарамалы тирәһендәге тигеҙлеккә үҙе саба торған машина төшөргән, ти.* Һ. Дәүләтшина.

**18.** Тотҡон хәленә ҡалдырыу. *Пленға төшөрөү.* / Ауға, тоҙаҡҡа һ. б. эләктереү. *Ауға балыҡ төшөрөү. Ҡапҡанға төлкө төшөрөү.*

**19.** Ғәҙәттә юкл. форм. **төшөрмәү.** Һәр саҡ ҡайҙалыр тотоу; һалмау, ташламау. *Баштан бүректе төшөрмәү.* ■ *Ул [Мостаҡим ҡарт] йәйҙең йылы көнөндә лә тире туның өҫтөнән, ҡолаҡлы кәпәсен башынан төшөрмәй.* С. Кулибай.

**20.** Берәй төрлө юл менән табыу, ҡулға эләктереү. *Аҡса төшөрөү. Мал төшөрөү.* ■ *[Әхмуш:] Иптәш Билалов, тик кенә ҡарауылда бер ҙә хеҙмәт көндәре килмәй бит әле. Башҡа эштә .. ҡатындар ҙа берәр ярым, икешәр хеҙмәт көнө төшөрә, ә мин унда етмеш биш сутыйға интегәм.* Д. Исламов. / Билдәле бер күләмдән күпмелер алыу, сығарыу. *Бойҙайҙың гектарынан утыҙар центнер төшөрөү. Диләнкәнән ике өйлөк бүрәнә төшөрөү.*

**21.** Тотҡан урын, дәрәжәнән алыу, сығарыу. *Директорлыҡтан төшөрөү. Урындан төшөрөү.*

**22.** Кем йәки ниҙеңдер өҫтөнән алыу, ниҙәндер ҡотолдороу. *Бурысты өҫтән төшөрөү.* ■ *Ҡотлау һүҙе әйтеүен көтөп, Ғәләүгә төбәлделәр. Ләкин ул: — Оло кеше, Ғариф ағай, йәштәр хөрмәтенә әйтеп ебәр бай һүҙеңде! — тип үҙ өҫтөнән йөктө анһат төшөрҙө.* Б. Бикбай.

**23.** Ҡәләм, буяу һ. б. ярҙамында ҡағыҙҙа һәм башҡа нәмәлә ниҙер кәүҙәләндереү. *Биҙәк төшөрөү. Проект төшөрөү. Рәсем төшөрөү.* ■ *Уның [Баныуҙың] алдындағы .. имәндәр, ваҡ кына ҡайын, ҡарама һәм сағандар теге ваҡытта Нуров Вил ҡара таҡтаға .. төшөргән йәш ағастарға оҡшай ине.* Ә. Вәли. *Әле мин вагонда, һүҙ араһында юлдаштарымдың һүрәтен блокнотыма төшөрөп барам.* С. Кулибай. / Кинола, фотола кәүҙәләндереү. *Киноға төшөрөү. Фотоға төшөрөү.*

**24.** *кусм.* Күпмелер хаҡҡа сығарыу, күпмегәлер торошло итеү. *Арзанға төшөрөп етештерелгән сода. Ҡиммәткә төшөрөп төҙөлгән йорт.*

**25.** *кусм. һөйл.* Иҫерткес эсемлек эсеү. *— Йә, әйҙәгеҙ төшөрөп алайыҡ әле. .. Бер аҙнанан бире ауыҙға алған юҡ. Эс ҡортлап китеүе бар бит.* К. Мәргән.

**26.** *-п* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, эш-хәрәкәттең һөҙөмтәһен белдерә. *Атып төшөрөү. Ауҙарып төшөрөү. Тартып төшөрөү.*

♦ **Асыу төшөрөү** *ҡар.* **асыу** [1]. **Ҡолаҡҡа төшөрөү** *ҡар.* **ҡолаҡ. Тап төшөрөү** *ҡар.* **тап** [1].

**ТӨШӨРӨШӨҮ** *к. урт. ҡар.* **төшөрөү** 1—7, 10, 11, 13, 16—17, 21, 23. *Арбанан төшөрөшөү. Шаршауҙы төшөрөшөү. Йылғаға һал төшөрөшөү. Арҡалыҡты төшөрөшөү. Май төшөрөшөү. Бейергә төшөрөшөү. Рәсем төшөрөшөү.*

**ТӨШӨРТӨҮ** *к. йөкм. ҡар.* **төшөрөү** 1—7, 9—18, 21—23. *Ағас төшөртөү. Һал менән бүрәнә төшөртөү. Газдың баҫымын төшөртөү. Урынынан төшөртөү.* ■ *— Алдаҡсы, йыландай телен сығарып, һүҙ бирә бит әле ул, ә мин, йәш иҫәр, уға ышанған булып, исемен ҡара таҡтанан төшөрттөм.* Б. Бикбай. *[Йәғәфәр:] һинең Рәүиләң айырылып ҡайтты. Ире балаһын төшөртөргә ҡушҡан.* И. Абдуллин.

**ТӨШӨҮ** *к.* **1.** Юғарынан йәки ниҙеңдер өҫтөнән аҫҡа, түбәнгә күсеп, урын алмаштырыу. *Арбанан төшөү. Аттан төшөү. Машинанан төшөү. Соҡорға төшөү.* ■ *Йорт хужаһы күтәрмәнән төшөп, уларға ҡаршы сыҡты.* М. Тажи. *Аҙнағол кәмәгә төшөп баҫты.* З. Биишева. / Ниҙеңдер өҫтөнән аҫтына табан атлау. *Баҫҡыстан төшөү.* ■ *Һайгисеүҙән төшәйек,— ти Ғәйзулла бабай,— йыраҡ йөрөргә бөгөн әллә ни итеп, быуындарым һыҙлап тора.* Н. Мусин.

**2.** Аҫҡараҡ күсеү, түбәнерәк торош алыу. *Күҙгә төшөп торған ҡаш. Яурынға тиклем төшкән сәс.* ■ *Йоҡас ҡарт тағы ла ҡалғып, башы, быуынһыҙ нәмә кеүек, бәлк итеп төшөп китте.* Ғ. Дәүләтшин. / Торған еренән аҫҡа күсеү, шыуыу (кейгән кейемгә ҡарата). *Ойоҡтоң ҡуныСы балтырға төшкән.* ■ *Ул [малай] күҙенә төшкән ҙур фуражкаһын күтәреп, ... эшлекле генә яуап бирә.* Д. Юлтый.

**3.** Аҫҡа табан йүнәлеп, берәй ергә ултырыу, яйлашыу. *Самолёт аэродромға төшә.* ■ *[Ғәфиәт:] Күрмәйһеңме ни, яраплан төшөп ята бит. Моғайын Булат ҡайтҡандыр.* И. Абдуллин. *Күгәл дә осор, күлгә төшөр, күлдән осоп, төшөр күрәнгә* (Халыҡ йырынан). / Ер өҫтөн биләп, солғап алыу. *Ҡараңғы төшә. Томан төшә. Әңер төшә.* ■ *Эҫе төшкәс, һыйырҙар сәнскәкләп, урман яғына инеп китә* (Әкиәттән).

**4.** Һауанан ергә ултырыу; яуыу, ҡуныу. *Ҡар төшә. Ҡырау төшә. Ямғыр күҙе төшә.* ■ *Таңға ҡаршы ысыҡ күберәк төшкән. Еүешкә ағарған үлән өҫтөнә баҫыу менән аяҡ урынында йәшел эҙ ҡала.* Я. Хамматов.

**5.** Һыу ағымы ыңғайына йәки тау юлы менән түбәнгә табан барыу. *[Яҙ] тирә-яҡ ауылдарҙың ярлылары ҡыуғынға китә. Улар һал менән Әйек буйлап Һаҡмарға, унан Уралға төшөп, Ырымбурға тиклем бара.* Ә. Вәли. *Мин ... Сорамандан түтәләп Көҙөй төштөм.* Ғ. Дәүләтшин. / Юғарынан йәки ниҙеңдер өҫтөнән аҫҡа, түбәнгә ҡарай һуҙылыу. *Келәт артынан йылғаға текә генә тау төшә.* Һ. Дәүләтшина.

**6.** Берәй станцияла, туҡталышта һ. б. транспорттан сығыу. *Уның [Тимерҙең] поездан тө-*

*шөүенә ике көн инде. Ауылға тиклем юл байтаҡ.* Б. Бикбай.

**7.** Ниндәйҙер юлға, урынға, йүнәлешкә аяҡ баҫыу. *Алға төшөп атлау.* ■ *Беҙ байтаҡ урман ситләберәк барҙыҡ та бер иҫке юлға төштөк.* Ш. Насыров. *[Булат:] Улар [Мөхиттәр] күперҙән сығып киткәнсә ҡарап ҡалдыҡ. Мөхит оло юлға төшкәс кенә өйгә индек.* К. Кинйәбулатова. *Тыш яҡтан йылманлап, дошмандар төшкән беҙ төшкән юл менән.* Ш. Бабнч.

**8.** Үҙ ауырлығы менән аҫҡа, түбәнгә китеү. *Ҡулдан төшөп китеү.* ■ *Талондар төшә лә ҡала... Береһен ерҙән алдым тигәндә икенсеһе төшә.* С. Агиш. *Беҙҙең окоп алдына бер снаряд төштө.* Д. Юлтый. *Һары япраҡ [ботағынан] өҙөлдө лә тирбәлә-тирбәлә ергә төштө.* Ә. Бикчәнтәев.

**9.** Һауанан һ. б. сағылып, нимәгәлер ятыу. *Ҡуләгә төшә.* ■ *Мине каршыларға пристандең уты ғына төштө Иҙелгә.* Ғ. Сәләм. / *күсм.* Кемгә лә булһа таралыу, ҡағылыу, тейеү. *Был тикшерелмәгән шигем бер Йәләлетдингә генә түгел, башҡаларына ла төштө.* С. Агиш. / *күсм.* Ҡапыл йөрәк, күңелде биләп, солғап алыу (хис, тойғоға ҡарата). *Йөрәккә ҡурҡыу төшөү. Күңелгә шик төшөү.* ■ *Минең күңелгә шом төштө: «Әҙәм заты булмағас, кем икән ул?»* Н. Мусин.

**10.** Йоҙроҡ йәки башҡа нәмә тәнгә һ. б. ергә эләгеү. *Йоҙроҡ төшә.* ■ *Аттар, тукмаҡ уҙҙәренә төшкәндәй, шунда уҡ ҡуҙғалып, оло юл буйына һыпыртты.* Б. Бикбай. / Кем йәки ниҙеңдер өҫтөнә йөк булып ятыу, өлөшөнә тура килеү. *Эштең ауыры йәштәргә төшә.* ■ *— Һиңә ауырлығым төшмәҫ, уҙ аягым менән ҡайтырлыҡ хәлем бар әле.* М. Тажи. *Һиңә, миңә төшә, бәгерем Ғәйшә, коммун итеү совет яланын!* Ғ. Амантай.

**11.** Ҡайһы урынғалыр тура килеү, ҡайҙалыр булыу (һүҙҙәге баҫымға ҡарата). *Баҫым икенсе ижекҡә төшә.*

**12.** Ныҡлы тормағанлыҡтан, тейгәндә һ. б. ҡубып сығыу. *Күнәктең төбө төшкән. Теш төшә. Тырнаҡ төшә.*

**13.** Ниҙең дә булһа көсө, күләме һ. б. әҙәйеү; кәмеү, түбәнәйеү. *Ҡандың баҫымы төшә. Һыуҙың кимәле төшә.* ■ *Ул [Муйыл] тирегә һалыу менән ... тирләп китергә лә, эҫелеге төшөп, төҙәлә башларға тейеш ине.* Һ. Дәүләтшина. / Һирәгерәк булыу (пульсҡа ҡарата). *Ауырыуҙың пульсы һаман төшмәй.* / Кимәл, дәрәжә йәһәтенән түбәнерәк булыу. *Әйбергә хаҡ төшкән.* / Абруй, дәрәжә йәһәтенән түбәнерәк булыу; кәмеү. *Абруй төшөү. Дәрәжә төшөү.* / *күсм.* Бошонҡо, төшөнкө хәлгә килеү. *Кәйеф төшә.* ■ *Тағы күңелем һүнеп, рухым төшә, һыҙлай йөрәк, ҡанды киптереп.* Х. Ғәбитов.

**14.** Етлекмәҫ борон, көн элгәре үле тыуыу. *Ҡатындың ауыры төшкән. Балаһы төшкән.*

**15.** Ниҙәндер барлыҡҡа килеү, алыныу. *Көбөлә май яҙа Әсмә. Бына хәҙер май ҙа төштө.* Н. Нәжми.

**16.** Ваҡытлыса тороу йәки ҡунып сығыу өсөн урынлашыу, инеү. *Квартираға төшөү.* ■ *Азаматовка Имәнтауҙа йыш булырға тура килә һәм ул гел Йомағужа ҡартҡа төшә ине.* Ә. Вәли. *Егет әсәһе менән ҡыҙ күҙләй сығып китә. Әсәһе менән бер ауылда яҡын бер кешегә барып төшә.* М. Буранғолов.

**17.** Ҡатын булып килеү. *Килен булып төшөү.*

**18.** Ашап боҙор һ. б. өсөн эйәләшеү (көйә, ҡорт кеүеккә ҡарата). *Кейемгә көйә төшкән. Ҡурай еләгенә ҡорт төшкән.* / Зарар итеү, боҙоу (ауырыуға, зарарлы нәмәгә ҡарата). *Күҙгә аҡ төшә. Тимергә тут төшә.* ■ *«Телеңә телсә төшкөрө!» — тип әрләп алдым мин үҙемде эстән генә.* Р. Ғабдрахманов.

**19.** Ниндәйҙер хәлгә ҡалыу. *Ҡайғыға төшөү. Ҡара тиргә төшөү. Хурлыҡҡа төшөү.* ■ *Йөрәк инде бер ҙә харап, сығып килә. Ниңә генә килдем икән, тигән көнгә төштөм бит.* Т. Йәнәби.

**20.** Ниндәйҙер эшкә, ниҙер эшләргә тәүләп тотоноу, башлау. *Бейергә төшөү. Бесәнгә төшөү. Сәсеүгә төшөү. Уҡырға төшөү.* ■ *Икенсе баҡуйға төшөр алдынан Йомағужа салғыһын яңый-яңый Моратовка һынаулы ҡараш ташланы.* Ә. Вәли.

**21.** Тотҡон хәленә ҡалыу. *Ҡулға төшөү. Пленға төшөү.* / Тота торған ау ҡоралына эләгеү. *Мурҙаға балыҡ төшкән.*

**22.** Берәй төрлө юл менән табылыу, ҡулға килеп эләгеү. *Мәжлес аҙағында һәр кем ҡулынан килгәнсә бүләк һала. .. Бер-ике көндән кейәү мәжлестә төшкән бүләктәрҙе алып, кәләшкә китә.* М. Буранғолов. *[Ҡудрәш:] Их, ҡапыл ғына ҡулға мең һум аҡса төшһә!* С. Мифтахов. / Билдәле бер күләмдән күпмелер алыныу, сығыу. *Арыштың гектарынан егермешәр, хатта егерме, бишәр центнер төшкән урындары бар.* Ә. Вәли.

**23.** Тотҡан урын, дәрәжәнән яҙып, түбәнгә ҡалыу. *Директорлыҡтан төшөү.* ■ *— Батша төшкән, инәй. Хөрриәт!* Һ. Дәүләтшина.

**24.** *күсм.* Кемдең йәки ниҙеңдер өҫтөнән алыныу. *Өҫтән йөк төштө.* ■ *[Мансур:] Таптыҡ, алып ҡайттыҡ. Беҙҙән бурыс төштө.* Ш. Насыров.

**25.** Ҡағыҙҙа һ. б. нәмәлә берәй төрлө кәүҙәләнеш табыу, эҙ ҡалдырыу. *Ваҡ биҙәк төшкән тауар. Ленин һүрәте төшкән значок.* ■ *— Эттән ҡурҡҡан икән, ҡурғашында ялбыр эт һүрәте төшә, ти.* Һ. Дәүләтшина.

**26.** Кино эшләгәндә берәй ролде башҡарып, ҡатнашлыҡ итеү. *Киноға төшөү.* / Фотографияла кәүҙәләнеү. *Фотоға төшөү.*

**27.** *күсм.* Ниндәйҙер хаҡ, баһаға килеү. *Арзанға төшөү. Анһатҡа төшөү. Ҡиммәткә төшөү.* ■ *Был ҡалала беҙгә фатир табыуы ла еңелгә төшмәне.* Т. Йәнәби.

**28.** *күсм.* Ниҙәндер аша йәшерен үтеп, ҡайҙа ла булһа инеү. *Өйгә төшөү.* ■ *[Булат:] Кит, һантыйҙар, кеше баҡсаһына төшөргә итә. — Үҙ баҡсаңда бер ни булмағас, кеше баҡсаһына ла төшәһең инде.* К. Кинйәбулатова.

**29.** *күсм.* Башта билдәләгән хаҡты кәметеү. *Яҙға табан ит ҡиммәтләнгәс, ул [ир] түшкәләрен тейәй ҙә китә ҡала баҙарына. Кире алып ҡайтһа ҡайта, һорағанынан төшмәй.* Р. Солтангәрәев.

**30.** Кемдән йәки ниҙәндер башлау. *Баштан төшөп һанау. Икенсе бүлектән төшөп уҡыу.*

■ *Эйе, иң баштан, тормошомдоң әлифбаһынан төшөп яҙырға тура килә миңә.* З. Биишева.

**31.** Ғәҙәттә күкл. ф. **төшмәү** һәр саҡ ҡайҙалыр булыу, тороу, дауам итеү. *Бүрке башынан төшмәй. Ойого аяғынан төшмәй. Самауыры өҫтәлдән төшмәй.* ■ *Был фильмдың әле булһа экрандан төшкәне юҡ.* Х. Ғиләжев.

**32.** *-п* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында эш-хәрәкәттең ҡапыл киҫкен рәүештә бөтөүен, тамам булыуын белдерә. *Алып төшөү. Ауып төшөү. Барып төшөү. Килеп төшөү. Емерелеп төшөү.*

**33.** *-а* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында эш-хәрәкәттең сикле булыуын белдерә. *Арта төшөү. Тыныслана төшөү. Бәләкәсәйә төшөү.*

◆ **Айышына төшөү** аңлау, төшөнөү. *«Күреү генә етмәй, айышына төшөргә кәрәк»,— тине Йәмғи.* Х. Ғиләжев. **Ауыҙҙан төшмәү** йыш телгә алыныу, йыш һөйләнеү. **Мунса төшөү** *шул уҡ* **мунса** инеү (*кар.* **мунса**). **Өҫтән төшмәү** ниҙер талап итеп, маҙаһыҙлау. **Теш төшөү** *кар.* **теш**[1]. **Төбөнә төшөү** *кар.* **төп**[1]. *Эштең төбөнә төшөү.* **Һыу төшөү** *шул уҡ* **һыу** инеү (*кар.* **һыу** 2).

● *Тыуған ерҙән төшкән ер яҡын.* Әйтем.

**ТӨШӘНДЕРЕҮ** *к. эйһ. ф. кар.* **төшәнеү** 1. *Бөгөн төндә ниңәлер төшәндерҙе.*

**ТӨШӘНЕҮ** *к.* **1.** Төш күреү; төшәү. *Төшәнеп, ҡурҡып уяныу.*

**2.** Йоҡоно өн икән тип, ниҙер эшләү; һаташыу. *Төшәнеп, тороп йөрөү.* ■ *Хәстә ҡатын был һуңғы һүҙҙәр менән төшәнә башланы.* Ә. Таңғатаров.

**ТӨШӘҮ** *к.* Төш күреү. *Таңда төшәгән төштө яҡшыға юрайҙар.*

**ТРА́ВМА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Тышҡы берәй тәьҫир (яраланыу, бәрелеү, бешеү һ. б.) һөҙөмтәһендә туҡымаларҙың йәки тән ағзаларының зарарланыуы. *Производстволағы травма. Баш һөйәгенең травмаһы. Травма алыу.* / Нервы ҡаҡшауы. *Психик травма.*

**ТРАВМАТИК** *с.* Травмаға мөнәсәбәтле. *Травматик яра.*

**ТРАВМАТО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Травматология буйынса белгес, врач.

**ТРАВМАТОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Медицинаның ағзаларҙың һәм туҡымаларҙың травматик зарарланыуын, уларҙы дауалау һәм иҫкәртеү менән шөғөлләнгән бүлеге. *Травматология пункты.*

**ТРАГЕ́ДИЯ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* **1.** Нигеҙендә тормоштағы килешә алмаҫлыҡ конфликт, характер һәм мәнфәғәттәрҙең киҫкен бәрелеше ятҡан һәм күп осраҡта геройҙың һәләкәте менән тамамлана торған драма әҫәре. *Шекспир трагедиялары.* ■ *— Бөгөн һәйбәт спектакль,— тине [Ҡадир],— Шиллерҙың «Мәкер һәм мөхәббәт» тигән трагедияһын ҡуялар.* Б. Бикбай.

**2.** *күсм.* Бик ауыр, ҡайғылы, тетрәткес ваҡиға; фажиғә. *Һуғышта күргән бөтә ауырлыҡтарға, трагедияларға, шул арҡала беҙҙә тыуған фекерҙәргә, беҙҙең эҙләнеүҙәргә минең өсөн ошо мәжлестә йомғаҡ яһалды.* Д. Юлтый. *Фашистик оккупация замандары тотош-тотош халыҡтар өсөн трагедия булды.* «Совет Башҡортостаны», 1965 9 май.

**ТРАГИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* **1.** Драматик йәки музыкаль әҫәрҙәге трагик һыҙат. *«Салауат Юлаев» операһының шиғри финалы ... мөхәббәткә гимн булып яңғырай, опералағы трагизм апофеоз дәрәжәһенә алып барып еткерелә.* «Ағиҙел», 1967, № 1.

**2.** Ниҙеңдер ауыр, тетрәткес яғы; фажиғә. *Тормош трагизмы.*

**ТРА́ГИК** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Трагедиялы ролдәр башҡарған актер.

**ТРА́ГИК** *с.* **1.** Трагедия әҫәрҙәренә мөнәсәбәтле. *Трагик жанр. Трагик шәхес. Ваҡиғаларҙың трагик рәүештә сиселеүе.*

**2.** Фажиғәле. *Трагик яҙмыш.*

**ТРАГИКОМЕ́ДИЯ** [*рус.*] *и.* Трагедия һәм комедия үҙенсәлектәрен эсенә алған драма әҫәре.

**ТРАДИЦИОН** [*рус.* традиционный] *с.* Традицияға нигеҙле, традицияға мөнәсәбәтле. *Традицион ҡараш. Традицион кейем. Традицион йола.*

**ТРАДИ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Тарихи нигеҙҙә барлыҡҡа килеп, быуындан быуынға күсә килгән төрлө йола, ғөрөф-ғәҙәт һ. б. *Революцион традиция. Традицияны боҙоу. Традицияны һаҡлау.* / Көнкүреш һәм ҡылыҡта урынлашҡан тәртип. *Традицияға инеү. Традицияға әйләнеү.*

**ТРАЕКТО́РИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Есемдең йәки нөктәнең арауыҡта хәрәкәт иткән юлы. *Баллистик траектория. Айҙың Ер тирәһендә әйләнеү траекторияһы. Электрондың траекторияһы.*

**2.** *хәрби* Атылған нәмәнең осоу юлы. *Минаның траекторияһы. Пуляның траекторияһы.*

**ТРАКТ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Машина һ. б. менән үтерлек оло юл. *Өфө-Ырымбур тракты.*

**ТРАКТА́Т** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Айырым бер мәсьәләне ҡараған ғилми хеҙмәт. *Политик трактат. Философик трактат.*

**2.** *иҫк.* Халыҡ-ара договор.

**ТРАКТИ́Р** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. иҫк.* **1.** Ресторанлы гостиница. *Сәғит .. трактирҙың бер башындағы дүрт номерға килеүселәрҙе ҡабул итеп, уларға аш ташып, номер таҙартып тора башланы.* А. Таһиров.

**2.** Түбән разрядлы ресторан. *Трактир һаҫыҡ, ҡараңғы, әшәке, төтөн, .. унда халыҡ мыжғып тора.. Ҡайһылары сәй эсә, ҡайһы берҙәре аш ашай.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТРАКТО́ВКА** [*рус.*] *и.* Нимәгәлер бирелгән аңлатма, төшөндөрмә. *Лениндың империализмға биргән трактовкаһы.*

**ТРАКТОВКАЛАУ** *к.* Асылын, мәғәнәһен сисеп аңлатыу. *«Погонһыҙ һалдаттар» романы жанр төрө, халыҡ темаһын яңыса трактовкалауы һәм һүрәтләгән характерҙарының оригиналлеге менән генә түгел, ә художестволы үҙенсәлеге менән дә айырылып тора.* Ә. Вахитов.

**ТРА́КТОР** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Тартыу көсө итеп тағылған йәки ҡуйылған төрлө машина-ҡорамалды хәрәкәткә килтереү өсөн тәғәйенләнгән тәгәрмәсле йәки ҡарышлауыҡлы үҙе йөрөмәле машина. *Ҡарышлауыҡлы трактор. Тәгәрмәсле трактор.* ■ *Тракторҙар дүртәр төрәнле ҙур һабан менән сиҙәмде актара.* А. Карнай.

**ТРАКТОРИ́СТ** [*рус.*] *и. кар.* **тракторсы.**

**ТРАКТОРСЫ** *и.* Трактор йөрөтөүсе. *Тракторсы булып эшләү.* ■ *[Айбикә] тракторсылар курсын бөтөрөп, колхоздың тракторсыһы булып алды.* Һ. Дәүләтшина.

**ТРАЛ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* **1.** Карап менән һөйрәп балыҡ тота торған оҙон тоҡ ау. *Ҡайһы бер йылғаларҙа балыҡты трал менән тотоу башлана.*

**2.** Диңгеҙ төбөн һәм ундағы үҫемлек, йәнлекте тикшереү өсөн булған ҡулайлама.

**3.** Һыу аҫты миналарын тотоп юҡ итә торған ҡулайлама.

**ТРА́ЛЕР** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* **1.** Трал менән балыҡ тотҡан карап.

**2.** Трал менән мина тотоп, уны юҡ итә торған хәрби карап.

**ТРАЛЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **траллау.**

**ТРАЛЛАУ** *ҡ.* **1.** Трал (1 мәғ.) менән һөҙөү. *Балыҡ траллау.*

**2.** Трал (3 мәғ.) менән тотоу. *Мина траллау.*

**ТРА́ЛЬЩИК** [*рус.*] *и. ҡар.* **тралер.**

**ТРАМВА́Й** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* **1.** Ҡалала ер өҫтөндәге электрлы тимер юл. *Демонстрация ағымы оло урамға сыҡты. Унда тағы .. трамвай эшселәре ҡушылды.* Д. Юлтый.

**2.** Шул юлдан йөрөгән бер йәки бер нисә вагонлы поезд. *Трамвайға ултырыу. Трамвайҙан төшөү. Трамвай менән барыу.*

**ТРАМВАЙСЫ** *и.* Трамвай йөрөтөүсе.

**ТРАМПЛИ́Н** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Осоу, һикереү һ. б. алыҫлығын арттырыу өсөн эшләнгән спорт ҡоролмаһы йәки яйланмаһы. *Саңғы трамплины. Һыуға трамплиндан һикереү.*

**2.** *күсм.* Ниндәйҙер эш өсөн башланғыс булған терәк.

**ТРАНЗИ́СТОР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* **1.** Электр сигналын көсәйтә һәм үҙгәртә торған ярым үткәргесле прибор.

**2.** Шундай приборҙан эшләнгән бәләкәй радио алғыс. *Йәштәр транзисторҙарын, магнитофондарын уйната.* Ш. Янбаев.

**ТРАНЗИСТОРЛЫ** *с.* Транзисторҙы файҙаланыуға ҡороулы. *Транзисторлы телевизор.*

**ТРАНЗИ́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ике аралағы бер урын аша йөк йәки кеше йөрөтөү эше. *Өфө тауар транзиты. Транзит станцияһы.*

**2.** Аралағы урында күсереп тейәмәй йөк йөрөтөү эше.

**ТРАНЗИТЛЫ** *с.* **1.** Транзитҡа (1 мәғ.) мөнәсәбәтле булған. *Транзитлы сауҙа.*

**2.** Аралағы урында күсереп тейәмәй йөрөтөлгән, транзит (2 мәғ.) менән бара торған. *Транзитлы вагон. Транзитлы йөк.* / Бер поездан самолёттан икенсегә күсеп ултыра торған. *Транзитлы пассажирҙар.*

**ТРАНСА** [*рус.* драница] *и.* Ярып эшләнгән йоҡа тар таҡта. *Транса ярыу. // Транса ҡыйыҡ.* ■ *Таҡта бысып, балта менән транса ярып, .. бер ай ваҡыт үтеп тә китә* (Хикәйәттән).

**ТРАНСКРИ́ПЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. лингв.* Телдәге өндәрҙе махсус хәреф, тамғалар менән дөрөҫ итеп биреү тәртибе һәм шундай тамғалар системаһы. *Фонетик транскрипция. Транскрипция тамғалары. Транскрипция яһау.*

**ТРАНСЛИТЕРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. лингв.* Бер яҙма хәрефтәренең икенсе яҙма хәрефтәре менән бирелеше.

**ТРАНСЛЯ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Телмәрҙең, музыканың, һүрәттең һ. б. радио, телевидение йәки сымлы бәйләнеш аша туранан-тура эш-хәрәкәт урынынан (театрҙан, стадиондан һ. б.) алыҫ араға тапшырылышы. *Спектакль трансляцияһы.*

**2.** Шул ысул менән алыҫ араға тапшырылған нәмә. *Трансляция тыңлау.*

**ТРАНСЛЯЦИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **трансляциялау.**

**ТРАНСЛЯЦИЯЛАУ** *ҡ.* Трансляция (1 мәғ.) менән биреү. *Концертты трансляциялау.*

**ТРАНСПАРА́НТ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Берәй һүрәт төшөрөлөп йәки текст яҙылып, рамға кирелгән туҡыма йәки ҡағыҙ. *Лозунглы транспарант.*

**2.** Тура яҙыу өсөн һыҙыҡһыҙ ҡағыҙ аҫтына һалына торған һыҙыҡлы ҡалын ҡағыҙ. *Транспарантҡа һалып яҙыу.*

**ТРАНСПЛАНТА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. мед.* Дауалау маҡсатында туҡыма йә ағзаларҙың күсереп ултыртылышы. *Трансплантация яһау.*

**ТРА́НСПОРТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Халыҡ хужалығының йөк йәки кеше йөрөтөүгә бәйле тармағы һәм йөрөтөү сараһы. *Автомобиль транспорты. Тимер юл транспорты. Йылға транспорты. Һауа транспорты. Транспортта эшләү.*

**ТРАНСПОРТЁР** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Йөк күсерә торған ҡоролма; конвейер. *Йөктө транспортёр ярҙамында күсереү.*

**ТРАНСПОРТИ́Р** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Мөйөш үлсәү һәм төҙөү өсөн градустарға бүленгән ярым түңәрәк менән линейканан торған һыҙыу приборы.

**ТРАНСПОРТСЫ** *и.* Транспорт хеҙмәткәре.

**ТРАНСФОРМА́ТОР** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Алмаш электр тогының көсөргәнешен күтәреү йә түбәнәйтеү ҡоролмаһы.

**ТРАНСФОРМА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* Трансформатор ярҙамында электр тогының үҙгәртелеше.

**ТРАНСФОРМАЦИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **трансформациялау.**

**ТРАНСФОРМАЦИЯЛАУ** *ҡ.* Трансформатор ярҙамында алмаш электр тогын үҙгәртеү.

**ТРАНШЕ́Я** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Оборона һыҙығының ут нөктәләрен бергә тоташтырған тар тәрән соҡор; ур. *Траншея ҡаҙыу.* ■ *Тыуған ил өсөн!» — тип ҡысҡырҙы Биктимеров һәм дошмандың беренсе траншеяһына ташланды.* Ә. Вәли.

**2.** Ниҙер һала, һаҡлай торған тәрән оҙон соҡор; ур. *Силос траншеяһы. Йәшелсәне траншеяларҙа һаҡлау.*

**ТРАП** [*рус.* ⟨*гол.*] *и.* **1.** Карап тағы баҫҡыс. *Тимер трап.* / Карапҡа менә һәм төшә торған баҫма. *Караптың якорь ташлауы булды, һалдаттар трап буйлап йүгерешеп төшә башланы.* Ғ. Аллаяров. / Самолётҡа менә һәм төшә торған баҫҡыс. *Самолёт туҡтап, ишек асылыу менән пассажирҙар .. трап буйлап берәм-берәм төштө.* В. Нафиков.

**2.** Төҙөлөш, театр һ. б. урында ҡулланылған

төрлө рәүештәге баҫҡыс. *Төҙөлөш трабы. Цирк трабы.*

**ТРАПЕ́ЦИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* **1.** Ике яғы параллель булған дүртмөйөш.

**2.** Ике бауға аҫылған арҡыры таяҡ рәүешендәге гимнастик снаряд. *Трапецияла уйнау.*

**ТРА́ССА** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* **1.** Ниҙәндер хәрәкәт итеү йәки урынлашыу йүнәлешен картала йәки ер өҫтөндә билдәләгән һыҙыҡ. *Нефть үткәргес трассаһы. Һауа трассаһы. Һыу трассаһы.* ■ *1933 йылдың көҙөндә төҙөлә башлаған Өфө-Ишембай тимер юлы ла бөтә халыҡ төҙөлөшөнә әйләнә... Ноябрҙә трассаға Өфө комсомолецтарының беренсе төркөмө килә.* Т. Әхмәҙиев.

**2.** Утлы пуля йәки снарядтың һауала ҡалған эҙе. *Йәшел, ҡыҙыл, һары трассалар һыҙып, пулялар теҙелеп оса.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1968, № 8.

**ТРАССАЛЫ** *с.* Осҡанда яҡты эҙ ҡалдырған. *Трассалы пуля.*

**ТРА́УЛЕР** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* Трал менән балыҡ тотҡан карап; тралер.

**ТРА́УР** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Кеше үлгәндә йәки афәт килгәндә белдерелгән ҡайғы; матәм. *Траур байрағы. Траур митингы. Траур маршы. Траур иғлан итеү.*

**ТРАФАРЕ́Т** [*рус.* 〈 *ит.*] *и.* **1.** Нимәгәлер һалып төшөрөү өсөн уйып яһалған әҙер һүрәт йәки яҙыулы йоҡа металл, пластмасса, ҡатырға һ. б. пластинка; өлгө. *Трафарет менән стенаға биҙәк төшөрөү.* / Шул ҡатырғаны һалып төшөргән һүрәт йәки яҙыу. *Сәскә трафарет.* // *Трафарет һүрәт.*

**2.** *күсм.* Эш, ҡылыҡта ҡабул ителеп ныҡыған өлгө; ҡалып. *Трафаретҡа короолған мәҡәлә.* // *Трафарет алым. Трафарет һөйләм.*

**ТРАХО́МА** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Күҙ ҡабағы аҫтындағы лайлалы тиренең һәм мөгөҙ ҡатлауҙың йоғошло хроник ауырыуы. *Трахома менән ауырыу. Трахома йоҡтороу.*

**ТРЕВО́ГА** [*рус.*] *и.* Ҡурҡыныс хәл һәм шуны хәбәр иткән сигнал. *Тревога сигналы. Тревога иғлан итеү.*

**ТРЕД-ЮНИО́Н** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* Англиялағы һәм ҡайһы бер инглиз телле илдәрҙәге профсоюз исеме.

**ТРЕД-ЮНИОНИ́ЗМ** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* Капиталистик илдәрҙә эшселәр һәм профсоюздар хәрәкәтенең маҡсатын экономик талаптар менән генә сикләгән ағым.

**ТРЕД-ЮНИОНИ́СТ** [*рус.*] *и.* Тред-юнионизм яҡлы кеше.

**ТРЕД-ЮНИОНИСТИК** *с.* Тред-юнионизмға мөнәсәбәтле. *Тред-юнионистик политика.*

**ТРЕЛЬЯ́Ж** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Үҫемлектәр өсөн ҡуйылған йоҡа рәшәткә.

**2.** Өс бүлекле көҙгө.

**ТРЕ́НЕР** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* Спорттың берәй төрө буйынса спортсмендарҙың эҙерләнеүенә етәкселек иткән белгес. *Хоккей командаһының тренеры.*

**ТРЕНИРО́ВКА** [*рус.*] *и.* Берәй һөнәргә, оҫталыҡҡа (мәҫәлән, йөҙөүгә, йүгереүгә һ. б.) өйрәнеү өсөн булған күнекмә. *Йөҙөү тренировкаһы. Тренировка үткәреү.*

**ТРЕСКА́** [*рус.*] *и.* Балыҡсылыҡ промыслаһы өсөн билдәләнгән төньяҡ диңгеҙ балығы.

**ТРЕСТ** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* **1.** Бер тармаҡтағы бер нисә предприятие берекмәһе һәм шул берекмәнең үҙәкләшкән идаралығы. *Төҙөлөш тресы. Ашхана тресы.*

**2.** *эк.* Ҙур табыш алыу өсөн бер идараға берләштерелеп, эш һәм сауҙа өлкәһендә, шулай уҡ йыш ҡына юридик яҡтан үҙаллығын юғалтҡан капиталистик предприятиелар монополияһы формаһы.

**ТРЕФ** [*рус.* трефы 〈 *фр.*] *и.* Уйын кәртененең ҡара тәре төшөрөлгән төрө. *Треф дамаһы.* // *Треф алтылыҡ.*

**ТРИБУ́Н** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** *тар.* Боронғо Римдағы төрлө вазифа кешеләре исеме. *Халыҡ трибуны. Хәрби трибун.*

**2.** Танылған оратор һәм публицист. *Революция трибуны.*

**ТРИБУ́НА** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Баҫып телмәр һөйләй торған ҡалҡыу урын. *Трибунаға менеү.* ■ *Вәлиулла Мортазин трибуна хеҙмәтен үтәгән һандыҡҡа баҫып, телмәр һөйләп алды.* С. Агиш. / *күсм.* Политик, публицистик эшмәкәрлек өлкәһе. *Әҙәби трибуна.*

**2.** Стадион һәм майҙандарҙағы рәт-рәт итеп, һикәлтәләп яһаған тамашасылар урыны. *Ипподром трибунаһы. Стадион трибунаһы.*

**ТРИБУНА́Л** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* **1.** Хәрби һәм айырыуса ҙур граждандылыҡ енәйәттәрен ҡарай торған суд органы. *Хәрби трибунал.* / *йыйн.* Шул органдың суд коллегияһы, судьялары.

**2.** Шул орган тарафынан суд эштәренең ҡаралышы. *Эште трибуналға биреү. Эште трибуналда ҡарау.*

**ТРИГОНОМЕТРИК** *с.* Тригонометрияға мөнәсәбәтле. *Тригонометрик таблица. Тригонометрик функция.*

**ТРИГОНОМЕ́ТРИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Геометрияның өсмөйөш яҡтары менән мөйөштәре араһындағы мөнәсәбәтте өйрәнә торған бүлеге. *Сферик тригонометрия. Тура һыҙыҡлы тригонометрия.*

**ТРИ́ЕР** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Игенде таҙартып, сортҡа айыра торған машина.

**ТРИКО́** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Өҫкө кейем өсөн һырлап һуҡҡан йөн туҡыма. *Костюм трикоһы.*

**2.** Бәйләнгән туҡыманан тәнгә һылаштырып теккән спорт йәки театр кейеме.

**ТРИКОТА́Ж** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Машина менән бәйләгән туҡыма. *Ебәк трикотаж.* // *Трикотаж кофта.*

**2.** *йыйн.* Шул туҡыманан тегелгән төрлө кейем. *Спорт трикотажы.*

**ТРИЛЛИО́Н** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Мең миллиардҡа тиң һан.

**ТРИЛО́ГИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Бер үк авторҙың дөйөм идея һәм сюжет менән бәйләнгән өс әҫәре. *Зәйнәб Биишева трилогияһына ингән өс китап — «Кәмһетелгәндәр», «Уяныу», «Яҡтыға» романдары байтаҡ тарихты эсенә ала, һүрәтләй.* Р. Байымов.

**ТРИНИТРОТОЛУО́Л** [*рус.*] *и.* Көслө шартлатҡыс матдә (мина, снаряд кеүек нәмәгә ҡулланыла); тол, тротил.

**ТРИ́О** [*рус.* 〈 *ит.*] *и.* **1.** Өс инструмент йәки өс

тауыш өсөн яҙылған музыка әҫәре. *Фортепьяно, кларнет һәм фагот өсөн трио.*

**2.** *муз.* Өс башҡарыусынан торған ансамбль. *Ҡурайсылар трионы.*

**ТРИО́Д** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Өс электродлы электр лампаһы.

**ТРИПТИ́Х** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Дөйөм идея һәм сюжет менән бәйле өс һүрәттән торған сәнғәт әҫәре.

**2.** *Дөйөм фекер менән бәйле өс шиғырҙан торған әҙәби әҫәр.*

**ТРИ́ТИЙ** *и.* [*рус.* ⟨ *гр.*] Ядроһы протон менән ике нейтрондан торған водородтың ауыр радиоактив изотобы (атом энергетикаһында һәм термоядро реакциялары башҡарыу өсөн ҡулланыла).

**ТРИТО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Саламандрҙар ғаиләһенә ҡараған кеҫәрткегә оҡшаш ҡойроҡло ер-һыу йәнлеге.

**ТРИУ́МФ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *тар.* Боронғо Римда еңеп ҡайтҡан полководецты һәм ғәскәрҙе ҡаршылау тантанаһы.

**2.** Ҙур уңыш; тантана. *Совет балетының триумфы.*

**ТРИУМФАЛЬ** [*рус.* триумфальный] *с.* Ҙур уңыш хөрмәтенә һәйкәл рәүешендә яһалған. *Триумфаль ҡапҡа.*

**ТРО́ЙКА** [*рус.*] *и.* Бер арбаға ҡушлап егелгән өс ат. *Тройка ла еккән берәү килә, тройкаһы ҡыйыш көймәле* (Халыҡ йырынан). / Өс ат егелгән арба. *Биктимерҙе ҡуш ҡыңғырау тағылған тройка менән килеп алалар* (Әкиәттән).

**ТРОЛЛЕ́ЙБУС** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Ҡалала кеше йөрөтә торған күп урынлы рельсһыҙ электр машинаһы. *Троллейбус паркы. Троллейбус маршруты.*

**ТРОМБ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* *мед.* Ҡан тамырындағы ойошҡан ҡан.

**ТРОМБО́З** [*рус.*] *и.* *мед.* Ҡан тамыры буйында ҡан ойошоуы.

**ТРОМБО́Н** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Дуғаһы оҙайтып һыҙылмалы тынлы музыка ҡоралы.

**ТРОП** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* *әҙ.* Күсмә мәғәнәлә әйтелгән һүҙ. *Метонимия менән метафора — троптың төп төрҙәре.*

**ТРО́ПИК** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Ер шары өҫтөндә экваторға параллель һәм унан төньяҡҡа йәки көньяҡҡа табан 23°27′ алыҫлыҡта торған ике уйланған түңәрәктең бере. *Ҡыҫала тропигы* (экваторҙан төньяҡта). *Ҡәҙәмөгөҙ тропигы* (экваторҙан көньяҡта).

**2.** Ер шарының экваторҙы ике яҡлап шул түңәрәктәр араһында ятҡан эҫе бүлкәте.

**ТРОПИ́К** *с.* **1.** Экватор тирәләп ятҡан эҫе өлкәләге. *Тропик тәбиғәт. Тропик урмандар.*

**2.** Шул эҫе өлкәгә хас. *Тропик ауырыуҙар. Тропик ямғыр. Тропик климат. Тропик эҫелек.*

♦ **Тропик йыл** *астр.* аҙғы көн менән төн тигеҙлеге нөктәһенән ҡояштың бер үтеүе менән икенсе үтеүе араһындағы ваҡыт.

**ТРОПОСФЕ́РА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Атмосфера һауаһының бөтә массаһының биштән дүртенең күберәген алып торған түбәнге төп ҡатламы.

**ТРОС** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Сүс йәки һығылмалы ҡорос арҡан.

**ТРОТУА́Р** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Урамдың ике яғындағы йәйәү кеше йөрөй торған юл. *Тротуарҙан барыу.* ■ *Демонстрация ағымы оло урамға сыкты. Тротуар буйлап ҡарарға килгән халыҡ тулды.* Д. Юлтый. *Һикәлтәле урам, юлдарға асфальт түшәлде, тротуар буйлап үҫә ултыртылған ағастар.* Ғ. Сәләм.

**ТРОФЕ́Й** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Һуғышта еңеп, дошмандан тартып алынған төрлө ҡорал һәм хәрби мөлкәт; ғәнимәт. *Беҙҙең ғәскәр бик күп трофей баҫып алды. Улар араһында 17 самолет, 2 миллион снаряд, ярты миллиондан артыҡ бомба бар ине.* Ә. Ихсан.

**ТРОЦКИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Үҙенең оппортунистик асылын һул радикаль һүҙҙәр менән томалап, эшселәр хәрәкәтендә ленинизмға ҡаршы эш иткән идея-политик ваҡ буржуаз ағым.

**ТРОЦКИ́СТ** [*рус.*] *и.* Троцкизм яҡлы кеше.

**ТРУБА́Ч** [*рус.*] *и.* Борғосо.

**ТРУ́БКА** [*рус.*] *и.* Телефон аппаратының тыңлау һәм һөйләү өсөн хеҙмәт иткән өлөшө. *Кәбир телефон трубкаһын ҡулына алды. Элек райисполкомға, унан председатель квартираһына шалтыратты.* Б. Дим. *Рәмзиә Ҡәҙерғолова Байназаров менән һөйләшеп бөтөп, телефон трубкаһын ҡуйҙы.* Х. Зарипов.

**ТРУБОПРОВО́Д** [*рус.*] *и.* Шыйыҡлыҡ, газ һ. б. нәмәне алыҫҡа ҡыуыу өсөн бер-беренә тығыҙ итеп ялғап ҡуйған торбаларҙан яһалған ҡоролма. *Трубопровод үткәреү.* ■ *Трубопровод хәҙерге заман транспортының иң осһоҙ һәм иң прогрессив тармаҡтарының бере.* М. Хисмәтов.

**ТРУ́ППА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Бер театр йәки циркта эшләгән артистар төркөмө. *Балет труппаһы. Опера труппаһы.*

**ТРУСИК** [*рус.* трусики ⟨ *ингл.*] *и.* Йоҡа материалдан тегелгән ҡыҫҡа ыштан. *Ҡояш көн буйы ҡыҙҙырҙы. Бындай көндө ҡайҙа инде салбар кейеү, хатта трусиғы ла ауыр тойола башлай.* И. Нигмәтуллин.

**ТРЮК** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Оҫта, эффектлы алым. *Акробатик трюк.*

**2.** *күсм.* Оҫта эшләнгән мутлыҡ; хәйләле, мәкерле эш, ҡылыҡ. *Дипломатик трюк.*

**ТРЮМ** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* **1.** Караптың төрлө нәмә тултыра торған иң аҫҡы ҡаты.

**2.** Сәхнә аҫтындағы урын.

**ТРЮМО́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ғәҙәттә аралыҡтағы иҙәнгә баҫтырып ҡуйыла торған бейек ҙур көҙгө.

**ТСС** [*рус.*] *ымл.* Шауламаҫҡа, шым булырға ҡушҡанда әйтелә.

**ТУАЛЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Өҫ кейеме (күберәк ҡатын-ҡыҙҙыҡы). *Юл туалеты.*

**2.** Көҙгөлө бәләкәй өҫтәл.

**3.** Өй, бина эсендәге әбрәкәй. *Туалетка инеү. Туалеттан сығыу.*

**ТУБАЛ** [1] *и.* Ҡабыҡтан киң һәм түңәрәк йәки оҙонса итеп яһалған һауыт. *Әхмәҙиҙең ҡатыны бер тубал йомортҡа күтәреп килəткә инде.* А. Таһиров. *Ағас баштарына һарыған күстәрҙе тубалға тултырыуҙа атайға ярҙам итеүҙәр тағы ла күңелле ине.* М. Ғафури. *Сәмит бер тубал бойҙайын ... бер дисәтинә ергә сәскән.* Ә. Харисов.

♦ **Тубалдай** (*йәки* **тубал кеүек) булыу** тумбыу. *Баш тубал кеүек булып китте. Ни йоко, ни йүнле ял юк был арала.* С. Әлибаев. *[Ҡуҙыйкүрпәстең] япраһы уңалырлыҡ түгел. Бот тубалдай булып шеште.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ТУБАЛ** [2] *и.* Аталыҡ биҙендә була торған шешек. *Тубал булыу.*

**ТУБАРЫЛЫУ** *к. диал. кар.* **тубырлау** [2] 2.

**ТУБЕРКУЛЁЗ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Махсус микробтан барлыҡҡа килеп, күберәк үпкә, эсәк-ҡарын, һөйәк һәм быуындарҙы зарарлай торған йоғошло ауырыу. *Туберкулёз диспансеры. Туберкулёз санаторийы. Туберкулёз микробы. Быуын туберкулёзы. Үпкә туберкулёзы. Туберкулёз менән ауырыу.*

**ТУБЕРКУЛЁЗЛЫ** *с.* Туберкулёз ауырыулы. *Туберкулёзлы кеше.*

**ТУБЫҠ** [1] *и.* Аяҡтың (малда алғы аяҡтың) бот һөйәге менән балтыр һөйәген тоташтырған быуыны. *Тубыҡ башы. Тубыҡ быуыны. Тубыҡ өҫтө. Тубыҡ һөйәге. Тубыҡҡа һалыу. Тубыҡ бөкләп (йәки тартып) ултырыу. Тубыҡ сәнсеп ултырыу. Тубыҡтан батыу.* ■ *Тубыҡтан ала ҡар йырып текә тауға артылыуы .. быуынды ала.* Н. Мусин. *Әхмәҙулла бабай тубыҡтарын ҡосаҡлап ергә ултырҙы.* Ә. Вахитов. *Минең бөгөн тубыҡ ҡалтырамай, күңелгә лә артыҡ ҡурҡыу төшмәй.* Д. Юлтый. **Ҡуш тубыҡ** эскә кәкре тубыҡ. **Тубыҡ ҡапҡасы** тубыҡ өҫтөндәге йомро һөйәк. / Кейемдең шул тәңгәлдәге өлөшө. *Салбар тубығы. Ыштан тубығы.*

♦ **Торна** (*йәки* **шайтан) тубығынан** «күп» тигән мәғәнәлә әйтелә. **Турғай тубығынан** «һай» тигән мәғәнәлә әйтелә. *Элек унарлаған тирмәнде әйләндергән йылғалар турғай тубығынан ғына булып ҡалған.* «Әҙәби Башҡортостан», 1958, № 11.

**ТУБЫҠ** [2] *и. диал. кар.* **аяҡ** [3].

**ТУБЫҠЛАНДЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **тубыҡланыу.** *Кешене тубыҡландырыу.*

**ТУБЫҠЛАНЫУ** *к.* **1.** Тубыҡты сәнсеү; йөгөнөкләү. *Тубыҡланып тороу. Тубыҡланып ултырыу.* ■ *Ҡарт тубыҡлана-тубыҡлана ерҙән торҙо.* М. Тажи.

**2.** *күсм.* Йөгөнөү.

**ТУБЫҠЛАУ** *к. диал. кар.* **аяҡлау** [2]. *Йөн тубыҡлау.*

**ТУБЫЛҒЫ** *и.* Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған, ялан яҡта үҫә торған аҡ сәскәле, ваҡ япраҡлы, ҡара ҡабыҡлы ваҡ ағас. *Тубылғы ла ағас ҙур булмаҫ, тубылғы ла үтә юл булмаҫ* (Халыҡ йырынан).

♦ **Дөйә тубылғыһы** ваҡ япраҡлы, сәнскәкле үлән. **Кәкүк тубылғыһы** еүеш болонда үҫкән ағыулы үлән.

**ТУБЫЛҒЫЛЫҠ** *и.* Тубылғы үҫкән урын. *Сәҙе генә буйы тубылғылыҡ, тубылғынан ситән үрмәнек* (Халыҡ йырынан).

**ТУБЫЛҒЫУ** *к.* Бейек, ҡуйы булыу (үҫемлеккә ҡарата). *Кеше тау битләүен икегә телеп, тугайға табан һуҙылған уйлағы тубылғып үҫкән үләндәр араһында йыллаған ҡараһыу ҡуңыр төҫтәге ҡыу ҡурайҙы күр[ҙе].* Н. Мусин.

**ТУБЫР** [1] *с.* Күп йөрөп, табаны ауыртып, ныҡлап баҫа алмаған (аяҡҡа ҡарата). *Тубыр булыу.* ■ *Ялбыр-ялбыр ялдарыңды уҡалармын, юрғам, тубыр-тубыр тояғыңды дағалармын, юрғам* (Халыҡ йырынан).

**ТУБЫР** [2] *окш.* Йомро ҡаты нәмәләр бер-бер атлы төшөп киткәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Тубыр итеп ҡойолоу.*

**ТУБЫРЛАУ** [1] *к.* Күп йөрөп, табан ауыртып, баҫа алмаҫ булыу; тубыр [1] булыу. *Ишетуган .. һеңлеһенең аяҡтары тубырлағанын күптән белеп килә ине.* З. Биишева.

**ТУБЫРЛАУ** [2] *к.* **1.** Тубыр-тубыр итеү, тубыр-тубыр килеү. *Тубырлап ҡойолоу.* ■ *Аяҡ аҫтында бәрәңге тубырлап ята.*

**2.** Ҡаты бөртөк булып ыуалыу. *Тубырлап торған икмәк.*

**ТУБЫРЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **тубырлау** [2]. *[Әбей:] Ҡайтып инһәләр [балалар], тубырлашып йөрөй.* С. Агиш.

**ТУБЫРСЫҠ** *и.* Ағастың ҡабырсаҡланып, ҡатланып торған орлоҡ көбө. *Шыршы тубырсығы. Ерек тубырсығы.* ■ *Ҡарағай башынан ергә тып итеп тубырсыҡ атылып төштө.* М. Тажи.

♦ **Һарыҡ тубырсығы** таштағы мүк өҫтөндә үҫә торған ваҡ ҡына ҡыҙыл сәскәле, тубырсыҡҡа оҡшап, ҡатланып-ҡатланып торған итләс япраҡлы үлән.

**ТУБЫРСЫҠЛАНЫУ** *к.* Тубырсыҡлыға әйләнеү, тубырсыҡлы булыу. *Ҡарағай тубырсыҡланған мәл.*

**ТУБЫР-ТУБЫР** *окш.* Ҡабат-ҡабат тубыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Тубыр-тубыр итеү.*

**ТУБЫРҺЫУ** *к.* Күп йөрөп, табан ауыртып баҫа алмаҫтай булыу.

**ТУВА** *и.* Туваның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (төрки телдәрҙең береһендә һөйләшә). *Тува халҡы. Тува теле.*

**ТУГРИК** [*монг.*] *и.* Монгол халыҡ республикаһының аҡса берәмеге.

**ТУҒАЙ** *и.* **1.** Һыу ағаслығындағы асыҡ ер; аҡлан, болон. *Туғай бесәне. Туғай сәскәһе.* ■ *Әрәмәне үтеп, туғайға сыҡтыҡ.* Н. Мусин. *Йылға аръяғында күгәреп ятҡан туғайҙың күңелле күренештәре — бөтәһе лә ауыл халҡының күңеленә туҡлыҡ, шатлыҡ тойғоларын һибә ине.* Т. Йәнәби. *Димдә тыуҙым, Димдә үҫтем, еләк йыйҙым туғайҙа* (Халыҡ йырынан).

**2.** *диал.* Әрәмә. *Туғай ағасы. Туғай утыны.*

**ТУҒАЙЛЫҠ** *и.* Һыу буйы ағаслығындағы асыҡ ер; туғай. *Яр буйҙарындағы туғайлыҡтарға томан төштө.* М. Тажи. *Иртән генә тороп, бер ҡараһам, туғайлыҡта йылҡы юшайҙыр* (Халыҡ йырынан).

**ТУҒАН** *и.* **1.** Ҡан ҡәрҙәш. *Алыҫ туған. Яҡын туған.* ■ *Беҙ, өс туған һуғышта йөрөйбөҙ. Ҡарт атайым яңғыҙы ауылда бөкрәнләп көн күргән була.* Д. Юлтый. **Бер туған** бер атай, бер әсәйле. *Бер туған ағай. Бер туған һеңле.* ■ *— Бер ҙә генә, балаҡайҙарым, бер туғандарға оҡшамағанһығыҙ, шул... Беҙ бер итәктә бишәү үҫтек, бер ҙә генә талашмай торғайныҡсы.* С. Агиш. **Ике туған** бер туғандарҙың балалары (бер-береһенә ҡарата). *Ике туған апай.*

**2.** *күсм.* Яҡын иптәш, дуҫ. *[Эшселәр — һалдат-*

*тарға:] Беҙ һеҙҙең туғандарығыҙ! Башҡа ваҡытта ла беҙҙең менән булығыҙ!* Д. Юлтый. / Яҡын итеп өндәшеү һүҙе.— *Әйҙә, мөғәллимә туған, табынға рәхим ит.* М. Тажи.

3. *диал.* Ҡусты йәки һеңле.

4. *с. мәғ.* Күңелгә яҡын, үҙ; ҡәҙерле. *Туған ҡала.* ■ *Ап-аҡ алтын йырҙарымды йырламайым данлыҡ өсөн, йырлайым алтын илем өсөн, үҙ туған халҡым өсөн.* Ш. Бабич.

◆ **Туғандар ҡәбере** *ҡар.* **ҡәбер.**

● *Ир туғаны ишек төбөндә, ҡатын туғаны ҡаҙан янында.* Әйтем.

**ТУҒАНАЙ** *и. диал.* Һеңлекәш.

**ТУҒАНДАШ** *с.* **1.** Дуҫлыҡ, яҡынлыҡ хисе менән бәйле, мәнфәғәттәре уртаҡ булған. *Туғандаш халыҡтар. Туғандаш республикалар.*

2. *и. мәғ.* Туған (1 мәғ.) тейешле кеше. *Рабиғаның үҫмер сағынан шундай етди мәсьәләләр тураһында уйланыуына атаһы менән бер туғандаштың улы Ғиләж Йомағолов ҙур йоғонто яһай.* М. Ғибаҙуллин.

**ТУҒАН-ҠӘРҘӘШ** *и. йыйн.* Алыҫ һәм яҡын туғандар; туған-ырыу.

**ТУҒАНЛАШЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡыҙ алып, ҡыҙ биреп, туған-ҡәрҙәшлек мөнәсәбәтенә инеү.

2. *ҡусм.* Дуҫ, иптәшлек мөнәсәбәтенә инеү. *Көндән-көн яҡынайҙы күңелдәрҙең аралары... Бер туғандай туғанлаштыҡ ҡырҡ атаның балалары!* А. Игебаев.

**ТУҒАНЛЫҠ** *и.* **1.** Ҡан ҡәрҙәшлек.

2. *ҡусм.* Яҡын, йылы мөнәсәбәт, иптәшлек. *Башҡорт халҡын украин халҡы менән дуҫлыҡ, туғанлыҡ ебе бәйләй.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 21 август.

● *Туғанлығыңды ҡайҙан беләйем, бөлгән көндө килмәнең.* Әйтем.

**ТУҒАНСЫЛ** *с.* Туған йәнле. *Туғансыл кеше.*

**ТУҒАН-ТЫУМАСА** *и. йыйн.* Бөтә булған яҡын туған; туған-ырыу. *Ниғмәтйән ағай .. кемгә барып һүҙ ҡушырға белмәне. Әйтерһең ул туған-тыумасаһыҙ, ағай-энеһеҙ ғүмер үткәргән.* Ә. Зәйнуллин.

**ТУҒАН-ЫРЫУ** *и. йыйн.* Барлыҡ туған; ҡәрҙәш-ырыу.— *Ошо ауыл малайы булһам да минең бында туған-ырыу юҡ.* Н. Мусин.

**ТУҒАРЛАНЫУ** *ҡ. диал.* Бөгәрләнеү, йомарланыу. *Ҡара йылан туғарланып, ҡәртә эсенә инеп ятҡан.* Ғ. Дәүләтов.

**ТУҒАРТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **туғартыу.** *Атты туғартыу.*

**ТУҒАРЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **туғарыу.** *Туғарылмаған ат.* ■ *Ишек алдында Хәмиттең арбаһы, туғарылып, лапаҫҡа бәйләнгән аты тора.* С. Агиш.

2. Егелгән ерҙән кире буш хәлгә, егелмәгән хәлгә ҡалыу. *Туғарылып китеү.* ■ *[Старшина:] Абайлап, нығытып егегеҙ, юлда туғарылып, ҡамасау һалып тормаһын.* Т. Хәйбуллин.

3. *ҡусм.* Эш, тәртип талабына ҡарата иғтибар һәм ихтыярҙы йомшатыу.— *Туғарылғанһығыҙ, егеттәр, туғарылғанһығыҙ. Колхоз артҡа китә башланы.* М. Тажи. *Ә мин, эстән уға ғашиҡ булып йөрөгән егет, был иғтибарҙан бөтөнләй туғарылып китәм.* З. Биишева.

**ТУҒАРЫУ** *ҡ.* **1.** Малды егелгән еренән бушатыу. *Атты туғарып, саналағы бесәнгә ҡуштыҡ.* С. Кулибай.

2. *ҡусм.* Эш, бурысты үҙеңдән кемгәлер тапшырыу; ауҙарыу. *Петроград ваҡиғаларының беҙҙең файҙаға уңышлы булып сығыуына гәләбәне Рәсәй эшсе-крәҫтиәндәренең бөтә ҡөстәренә туғарырға тура килә.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**ТУҒАРЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **туғарыу** 1. *Ат туғарышыу.*

**ТУҒРЫ** *с. иҫк.* Туры. *Туғры юл.*

**ТУҒЫҘ** *төп һ.* 9 һаны. *Ун туғыҙ.* / Кем йәки нимәнеңдер 9-ға тиң иҫәбе. *Туғыҙ тапҡыр. Туғыҙ ҡатлы йорт. Туғыҙ кеше.* ■ *Бында бөтәһе һигеҙ хеҙмәткәр, минең менән туғыҙ булабыҙ.* С. Агиш.

◆ **Туғыҙға түкмәстереү** төрлөсә үҙгәртеп боҙоу. *Туғыҙға түкмәстереп һөйләү.*

**ТУҒЫҘАР** *бүл. һ.* Һәр бере туғыҙҙан торған, туғыҙға тиң. *Кеше башына туғыҙар һумдан бүлешеү.*

**ТУҒЫҘЛАП** *сама һ.* Туғыҙ тирәһе, туғыҙға яҡын. *Туғыҙлап кеше.*

**ТУҒЫҘЫНСЫ** *рәт һ.* Урын тәртибе 9 менән билдәләнгән. *Туғыҙынсы класта уҡыу. Туғыҙынсы көн.*

**ТУҒЫЛАУ** *ҡ. диал. ҡар.* **туҡыу**[2].

**ТУҒЫН** *и.* Тәгәрмәстең күсәре менән тырнаҡтарын беркетеп торған түңәрәк өлөшө. *Тәгәрмәс туғыны.* ■ *Бында шулай ағас бешереп, ут аҫтында тотоп киптереп, йәш егеттәр туғын бөгә, тын туғайҙы завод иттереп.* Ә. Ихсан.

**ТУҒЫНСЫ** *и.* Туғын бөгөүсе. *Туғынсы булыу.*

**ТУҒЫР** *и. иҫк.* Аусының ҡош ҡундыра торған ҡолғаһы. *Туғыры юҡ шоңҡармын, тыу йәбендә осормон* (Ҡобайырҙан).

**ТУҒЫРЛАМА** *и. диал.* Ҡара иңкеш.

**ТУҒЫРЛАУ** *ҡ. ҡар.* **тығырлау.**

**ТУҘ** *и.* Ҡайындың иң тышҡы ҡабығы. *Туҙ һағыҙы. // Туҙ һауыт.* ■ *Аҡбулат ҡарт ғүмер буйы .. туҙ һыҙырған да дегет ҡайнатҡан, ерек ҡырҡҡан да ҡүмер үртәгән* (Әкиәттән).

◆ **Туҙға яҙмаған** кеше ышанмаҫлыҡ ялған; буш. *Туҙға яҙмаған хәбәр. Туҙға яҙмаған һүҙ. Туҙға яҙмағанды һөйләү.*

**ТУҘАҠАЙ: туҙаҡайҙы туҙҙырыу** 1) туҙан туҙҙырыу (елә сапҡанда). *Аласабыр .. туҙаҡайын туҙҙырып, сәсрәтеп сығып киткән кем, артынан саңдар ғына уйнап ҡалған* (Әкиәттән); 2) *ҡусм.* ныҡ орошоу, әрләү. *Атайың белеп ҡалһа, туҙаҡайыңды туҙҙырыр.*

**ТУҘАН** *и.* Бик ваҡ онтаҡ рәүешендәге быҫраҡ; саң. *Юл туҙаны. Туҙан ҡутәреү. Туҙан йотоу. Туҙанды һөртөү.* ■ *Юл буйынан туҙан борҡотоп, уракҫылар ҡайта ауылға.* Ғ. Амантай. *Ямғыр артынан ҡала һауаһы иркенәйеп китә. .. Алма ағастары, тирәктәрҙәге йәшеллектәр тағы ла асыҡлана, өҫтәренә һырышҡан туҙанды йыуып төшөрә.* С. Агиш.

◆ **Туҙан туҙҙырыу** талаш, тауыш ҡуптарыу.

**ТУҘАНЛАНЫУ** *ҡ.* Туҙан менән ҡапланыу; саңланыу.

**ТУҘАНЛАУ** *ҡ.* Туҙан манән ҡаплау; саңлау. *Кейемдә туҙанлау.*

**ТУҘАЯҠ** *и.* Туҙҙан эшләнгән һауыт; тырыз. *Ул [Хөрмәт] атаһы яһап биргән туҙаяҡ менән күп итеп еләк йыйҙы.* Ж. Кейекбаев.

**ТУҘБАШ** *и.*, **туҙбаш йылан** Башының ян яҡтарында ике һарғылт табы булған ҡуңыр төҫтәге ағыуһыҙ йылан.

**ТУҘҒАҠ** [1] *с.* Туҙып, ялбырлап тороусан. *Туҙғаҡ сәс.*

**ТУҘҒАҠ** [2] *и.* Үҫемлектең туҙып, осоп торған мамығы. *Бөгәрләнде бәпембәләр, йәйге елгә осто туҙғаҡ.* Р. Бикбаев.

**ТУҘҒАҠЛАНЫУ** *к.* Туҙып, ялбырлау. *Туҙғаҡланған сәс.*

**ТУҘҒАҠЛАУ** *к.* Туҙҙырып, ялбырлатыу. *Сәсте туҙғаҡлау.*

**ТУҘҒАНАҠ** *и. диал.* Бәпембә.

**ТУҘҒЫТЫУ** *к.* Туҙҙырып, ялбырлатыу. *Сәсте туҙғытыу.* ■ *Ерән ҡашҡа килә күҙ алдыма толом кеүек ялын туҙғытып.* Х. Ҡунаҡбай.

**ТУҘҒЫУ** *к.* **1.** Туҙып, таралыу. *Һеркә сәскәһе менән биҙәлгән берәр ҡарышлы башаҡтар бәрелгәндә, һары саң туҙғып китә.* Р. Ғабдрахманов.

**2.** Туҙып, ялбырлау. *Дамир ағай .. туҙғыған сәстәрен дә тәртипкә килтерергә онотоп, ярһып-ярһып һүҙен дауам итә.* С. Кулибай.

**ТУҘҒЫШЫУ** *к. урт. кар.* **туҙғыу.** *Туҙғышып китеү.*

**ТУҘҘЫРЫУ** *к.* **1.** Алама, иҫке, яраҡһыҙ хәлгә килтереү; иҫкертеү. *Кейемде туҙҙырыу.* ■ *Тун киймәгән тун кейһә, ҡаға-ҡаға туҙҙырыр* (Ҡобайырҙан). / *күсм.* Һаулығын бөтөрөп, таушалдырыу; ҡаҡшатыу. *Ауыр эш кешене туҙҙыра.*

**2.** Тарау, йыйнаҡһыҙ хәлгә килтереү; болартыу. *Нәмәләрҙе туҙҙырып ташлау. Сәсте туҙҙырыу.* ■ *— Бала-сағаға ҡалдырып китһәң, өйҙө туҙҙырып бөтөрөр.* Ғ. Дәүләтшин. *Айыу .. ҡырмыҫҡа иләүен сапсып туҙҙырырға керешкән һәм ер менән тигеҙләп киткән.* Ж. Кейекбаев.

**3.** Тирә-яҡҡа сәсрәтеп осороу; борҡотоу. *Йөн туҙҙырыу. Саң туҙҙырыу.* ■ *Снарядтар килеп төшһә, уттан буран туҙҙыра* (Бәйеттән).

**4.** *күсм.* Әрәмгә, бушҡа ебәреп юҡ итеү; тәләф итеү. *Аҡса туҙҙырыу.* ■ *[Бай] алып сыҡҡан байлығын әкренләп туҙҙырып бөтөрә. Шунан өҫ кейемдәрен һатып эсә* (Әкиәттән).

**5.** *күсм.* Пыран-заран килтереп юҡ итеү. *Беҙҙең ойошманы туҙҙырҙылар. Ойошма ағзаларын ҡулға алдылар.* Ә. Чаныш. *Ғүмеркәйем булһа, бер ҡайтырмын туҙҙырырға Тимаш баярын* ( Халыҡ йырынан).

**6.** *күсм.* Ныҡ ярһып тетмәһен тетеү. *Әхмәҙи уларҙы [малайҙарҙы] туҙҙырып әрләп ташланы.* Ж. Кейекбаев.

◆ **Пыр туҙҙырыу** *кар.* **пыр** [2]. **Туҙан туҙҙырыу** *кар.* **туҙан.**

**ТУҘРАУ** *к. диал.* Туҙғыу. *Туҙрап ятыу.*

**ТУҘЫЙ** *и. диал. кар.* **тырыз** [1].

**ТУҘЫҠА** *и. иҫк.* Бер туғандарҙың балалары (бер-береһенә ҡарата). *Улайға китһә, Кинйәнең үҙ ағалары, туҙыҡалары ла шулар араһында ерегеп йәшәй.* Ғ. Ибраһимов.

**ТУҘЫЛЫУ** *к. диал. кар.* **туҙыу** 2. *Туҙылған сәс.*

**ТУҘЫНЫУ** *к.* **1.** Пыран-заран килеп боларыу; туҙғыу. *Эй килә койон туҙынып, суп-сар оса өйөлөп.* Х. Түләкәйев. / Зыҡ ҡубып ҡуҙғалыу, боларыу; ҡуҙғыу. *[Иркә:] Уй, шундай шау-шыу унда: мастерскойҙы һеперәләр, йыйыштыралар. [Өммиә:] Бәй, нимәгә туҙыналар шул саҡлы?* Ғ. Әхмәтшин.— *Бер оя ҡорғас, тағы туҙынырғамы?* Х. Ғиләжев.

**2.** *күсм.* Асыуланып, ярһып, әрләшеү; туҙыу. *Сәй эсергә ингәс, [Новиков] туҙынып китте. Атлы ҡаҙағын да, генералын да, һүгышын да — бөтәһен дә ләғнәтләне.* Д. Юлтый.

**ТУҘЫУ** *к.* **1.** Тотоноу, ваҡыт үтеү арҡаһында алама, иҫке, яраҡһыҙ хәлгә килеү; иҫкереү. *Кейем туҙа. Өй туҙа.* ■ *— Яңы тауар алмағас ни, яҫтыҡ, мендәр тыштары ла туҙып, карайып, йыртылып бөттө.* Ғ. Дәүләтшин. *Ҡамсат ҡына бүрек туҙмай тиҙәр, ҡырылып уҡ ситенән туҙа икән* (Халыҡ йырынан). / *күсм.* Көс-хәл, һаулыҡ бөтөп, таушалыу; ҡаҡшау. *Колхоздың элекке председателе — шаҡтай тәжрибәле кеше, ҡаты ҡуллы, ләкин ҡартлыҡ менән туҙа төшкән.* С. Агиш.

**2.** Тарау, йыйнаҡһыҙ хәлгә килеү; боларыу. *Сәс туҙған. Туҙып ятҡан нәмәләр.* ■ *Сәғиҙә көлтәне бауынан ғына тотоп күтәргәйне, бау өҙөлөп, көлтә туҙып китте.* М. Тажи. / Урынлашҡан тәртип, нигеҙҙе боҙоп, тарҡалыу; зыҡ ҡубып ҡуҙғалыу; боларыу. *[Билал:] Семьяла тәртип булмаһа, оя туҙа, емерелә.* Ҡ. Даян.

**3.** Тирә-яҡҡа сәсрәп осоу; борҡоу. *Саң туҙа. Йөн туҙа.* ■ *Хәби бай .. танауынан ҡан туҙып, аунап ятыуын күргәс, сарбайлап ҡысҡыра башланы.* Т. Хәйбуллин.

**4.** *күсм.* Әрәмгә, бушҡа китеп, юҡ булыу; тәләф булыу. *Ҡулдағы аҙ-маҙ аҡса туҙмаҫ борон Гөлйөҙөмдө һоратып, тиҙерәк яусы ебәрергә булдылар.* Һ. Дәүләтшина.

**5.** *күсм.* Асыуҙан нык ярһып әрләшеү. *Аҡназар .. хәлде бисәһенә һөйләп биргән. Бына бисәһе туҙып киткән бының, .. тауыш ҡуптарған* (Әкиәттән).

◆ **Ене туҙыу** *шул уҡ* **ене ҡубыу** (*кар.* **ен** [1]). **Ҡанға туҙыу** *шул уҡ* **ҡанға батыу** (*кар* **ҡан** [1] 1). **Пыр туҙыу** *кар.* **пыр** [2].

**ТУҘЫШЫУ** *к. урт. кар.* **туҙыу** 2, 3, 5.

**ТУЖУРКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Өйҙә, эштә кейә торған куртка. *Брезент тужурка. Күн тужурка.*

**ТУЗ** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и.* **1.** Бер үк төҫтәге кәрттәрҙең уртаға төшөрөлгән яңғыҙ тамғалы иң олоһо. *Туз менән каплау.*

**2.** *күсм.* Бер эш өлкәһендә ҙур вазифа биләгән йоғонтоло кеше. *Финанс туздары.*

**ТУЙ** *и.* **1.** Шатлыҡлы ваҡиға хөрмәтенә ойоштолған тантана; байрам. *Еңеү туйы. Бәпес туйы. Исем туйы.* ■ *Әйләр хандың бер ир балаһы тыуа. Ул шатлыҡтан бөтә тирә-яҡты саҡырып, туй үткәреп ебәрә.* «Алпамыша».

**2.** Никахлашыу уңайы менән ойошторолған мәжлес. *Туй бүләге. Туй малы. Туй һебәһе. Туй яһау. Туйға барыу.* ■ *Фатима менән Ҡадирҙың туйын үткәрҙеләр. Ике йәш кеше тормош юлына аяҡ баҫты.* Б. Бикбай. **Алтын туй** ир менән ҡатындың илле йыл бергә ғүмер итеүенә арналған ғаилә байрамы. **Көмөш туй** ир менән ҡатындың егерме биш йыл ғүмер итеүенә

арналған ғаилә байрамы. **Ҡыҙыл туй** муллаһыҙ, яңыса үткәрелә торған туй. **Туй ашы** ҡоҙа малының нтенән бешергән туй ашы. **Туй төшөрөү** ҡыҙҙы кейәү йортона күсереп килтереү. **Туй һимеҙ!** йола буйынса, туй бүләге һалыу башланыр алдынан әйтелгән һүҙ. *Бына кемдер: «Туй һимеҙ!» — тип һөрәнләп ебәрҙе. «Туй һимеҙ!! Туй һимеҙ!!» — тип башҡалар ҙа ҡушылды.. Туй бүләге һалыу башланды.* Р. Солтангәрәев. **Һөйһөн туйы** ҡыҙҙы кейәү йортона оҙатыр алдынан ата йортонда үткәрелә торған ҡунаҡ мәжлесе. **Һырға туйы** ҡоҙалашҡан кешеләрҙең балалары үҫә төшкәс, уларҙы күрештерер өсөн үткәрелә торған мәжлес. *Вәли ат менерлек, Зөлхизә көйәнтә күтәрерлек булып ҙурайғас, ике ҡоҙа һырға туйы уҙғарған, береһе «килен», икенсеһе «кейәү» тип тә йөрөй башлаған* (Хикәйәттән).

**ТУЙҒЫҘЫУ** *к. диал.* Туйҙырыу.

**ТУЙҘЫРЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **туйҙырыу** 1—3. *Туйҙырылған балалар.*

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **туйҙырыу** 4. *Гел бергә лә бергә. Туйҙырылды, һүҙҙәрең дә тейә намыҫҡа.* М. Кәримов.

**ТУЙҘЫРЫУ** *к.* **1.** Туҡ хәлгә килтереү, туҡ итеү. *Баланы туйҙырыу. Тамаҡты туйҙырыу.*

**2.** Аҙыҡ менән тәьмин итеү; ашатыу, туҡландырыу. *Атайым элек-электән һунарсы булған. Бәлки, иген сәсерлек тә ере булмағас, йәнлек аулап, ғаиләһен туйҙырырға мәжбүр булғандыр.* Я. Ҡолмой.

**3.** Нимәгәләр мулыҡтырыу, кинәндереү. *Кейемгә туйҙырыу.*

**4.** *күсм.* Күңелде биҙҙереү; ялҡытыу. *[Женя:] Был тормош тамам туйҙырҙы инде. Әллә ҡайҙа алыҫҡа, Рәсәй эсенә китке килә. Әйтәм бит, һис кенә торғо килмәй.* Д. Юлтый.

● *Бүрене аяғы туйҙыра.* Мәҡәл.

**ТУЙЛАУ** *к.* **1.** Байрам яһап, тантаналау. *Ауылда дыу килтереп көҙгө байлыҡты туйлайҙар. Ҡайынлы ауылы иртәнән киҫкә тиклем оло байрамдағы кеүек, гөр килеп тора.* Б. Бикбай.

**2.** Туй (2 мәғ.) яһау. *[Нурлыбикә:] Үҙебеҙҙең йола буйынса, ҙур итеп туйлап, ололап төшөрәһе ине лә.* Ғ. Ибраһимов.

**ТУЙЛЫҠ** *и.* Туй һыйлар өсөн алып киленгән мал һәм төрлө аҙыҡ. *Туйға килгән туйлыҡтың, бешерәйем тиһәм, сыры юҡ* (Туй йырынан).

**ТУЙМАН** *с. диал. ҡар.* **биҙәр** [2]. *Юл буйында ай күренә [ашлыҡ] уңған булып, уртаһында үлән үҫә урман булып. Улан-ушаҡ утамайҙыр туйман булып, урған сакта ҡулға ҡаҙала тиҙер имде* (Бәйеттән).

**ТУЙМАҪ** *с.* **1.** Туйыуҙы белмәҫ. *Туймаҫ тамаҡ.* ■ *Шәхми ык-мык итте, ҡыҙарынды, бүртенде. «Был кәһәр һуҡҡан бигерәк туймаҫ күҙ икән, бөтә майҙан яҙҙыра бит инде», — тип уйланы.* Т. Йәнәби.

**2.** *күсм.* Ҡәнәғәтләнеүҙе, шөкөр итеүҙе белмәҫ. *Туймаҫ күңел.*

**ТУЙРА** [1] *и.* Ваҡ, йәш имән. *Район үҙәген үткәс, битләүҙәрен туйра, йүкә, саука ҡаплаған урләстәр йышая төшә.* Н. Мусин.

**ТУЙРА** [2] *и. диал. ҡар.* **туйыр** [2].

**ТУЙРАЛЫҠ** *и.* Туйра үҫкән ер. *Ғөмәр ауылының .. эшкингән урманы юҡ, булғаны тикләме туйралыҡ та саукалыҡ һәм Үҙәште туғайының әрәмәһе.* Ж. Кейекбаев.

**ТУЙТАҠЛАУ** *к. ҡар.* **туйтанлау.**

**ТУЙТАНЛАУ** *к.* Туйтан-туйтан итеү. *Туйтанлап атлау.*

**ТУЙТАНЛАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **туйтанлау.** *Туйтанлашып килеү.*

**ТУЙТАН-ТУЙТАН** *окш.* Ике аяҡты саҡ баҫып, аҡһаған һымаҡ атлағанды белдергән һүҙ. *Туйтан-туйтан атлау. Туйтан-туйтан итеү.*

**ТУЙЫҘ** [1] *и. диал.* Кузов.

**ТУЙЫҘ** [2] *и. диал.* **1.** Туҙ. *Туйыҙ һыҙырыу.*

**2.** Тырыҙ. *Туйыҙға еләк йыйыу.*

**ТУЙЫМЛЫҠ** *и.* Ашап туйыр нәмә.— *Һинең йырың туйымлыҡ тип беләһеңме әллә?* Н. Мусин.

● *Туй ашы — туйымлыҡ түгел, күңеллек.* Әйтем.

**ТУЙЫМҺАҠ** *с.* Тиҙ туйыусан.

● *Көҙгө ҡунаҡ туйымһаҡ, яҙғы ҡунаҡ һорамһаҡ.* Әйтем.

**ТУЙЫМҺЫҘ** *с. диал.* Туймаҫ.

**ТУЙЫН** *и. диал.* Балсыҡ.

**ТУЙЫНДЫРЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **туйындырыу.**

**ТУЙЫНДЫРЫУ** *к.* **1.** Ашатып туйҙырыу. *Малды туйындырыу. Баланы туйындырыу.*

**2.** Аҙыҡ менән тәьмин итеү; ашатыу, туҡландырыу. *Ел тирмәне, ел тирмәне, ектең етеҙ елдәрҙе, иген тартып, он борлатып, туйындырҙың илдәрҙе.* Й. Солтанов.

**3.** Ни менәндер кәрәгенсә тәьмин итеү. *Тупраҡты дым менән туйындырыу.*

**ТУЙЫНЫУ** *к.* **1.** Ашанып туйыу. *Туйынып алыу.* ■ *Өләштө уға [Әхмәҙуллаға] былай ҙа ҙурыраҡ бирәләр, иптәштәре лә килеп тора. Юҡ, [операциянан һуң] һаман туйынып булмай.* Р. Солтангәрәев. *Иртәнсәкәй торһам, туйына алмайым баҡсаларҙа үҫкән алмаға* (Халыҡ йырынан).

**2.** Тамаҡ туйҙырыу, туҡланыу; йән аҫрау. *Алғы һыҙыҡҡа кухня, аҙыҡ килгәне юҡ. Бирелгән сохари, консерва запастары менән генә туйынабыҙ.* Д. Юлтый.

**3.** Ни менәндер тәьмин ителеү. *Башаҡтарҙың емгә ултырып, туйыныу көндәрен тының менән тартып алырҙай булаһың.* Ф. Иҫәнғолов. *Ҡырҡтынан .. ваҡ йылғалар башлана. Улар ер аҫты һыуы менән туйынғанлыҡтан, йәйен һалҡын була, ҡышын туңмай ята.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 11 апрель. / Нимәгәләр мулығыу; туйыу. *Һыуға туйынған тупраҡ.*

**ТУЙЫР** [1] *с.* Күп тынлы ҡайыштан йыуан итеп үреүле (ҡамсыға ҡарата). *Артта берәүһе туйыр ҡамсы менән Айбулаттың арҡаһына өҙләкһеҙ һуға.* Һ. Дәүләтшина.

**ТУЙЫР** [2] *и.* Имән сәтләүегә.

**ТУЙЫС** *и. диал. ҡар.* **тырыҙ** [1] 1.

**ТУЙЫУ** *к.* **1.** Туҡ хәлгә килеү, туҡ булыу. *Ашап туйыу. Нык туйыу. Тамаҡ туйҙы.* ■ *Бөтәһе лә сәй эсеп туйҙы. .. Емеш самауырҙы күтәреп, аш өйөнә алып сығып китте.* З. Биишева.

**2.** Нимәгәләр мулығыу, кинәнеү. *Икмәккә туйыу. Кейемгә туйыу. Һаулыкка туйыу. Һыуға туйыу.* ■ *Бына ерҙең күбеһен бишнәккә һатканы бире, тамак иткә түгел, һөткә лә туймай башланы.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Танһыҡ каныу, ҡәнәғәт булыу. *Ҡарап туйыу. Туйғанса йөрөү. Туйғанса йоклау.* ■ *Бына [Хөмәйрә] илап туйҙы. Күңеле бушап, тынысланып ҡалды.* Ф. Иҫәнғолов. *Байтак вакыт уҙҙы. Һылыу менән килене утка кыҙынып туйҙы.* Т. Йәнәби.

**4.** *күсм.* Күңел биҙеү, ялҡыу. *Фәлсәфәнән туйҙык инде, һатма, ташла фәлсәфәң.* Ш. Бабич. *Сит илдәргә китеп йөрөү менән тыуған, үҫкән илдән кем туйған* (Халыҡ йырынан).

◆ **Туйып һикереү** рәхәт тормошҡа сыҙамай шашыу.

● *Якшы менән бергә булһаң, малга туйырһың.* Әйтем.

**ТУК** [*рус.*] *и.* Минераль ашлама. *Азот туғы. Калий туғы. Фосфор туғы.*

**ТУҠ**[1] *с.* **1.** Ашап, эсеп алған, ас түгел. *Тук бала. Тук мал. Тук булыу.* ■ *[Кейеҙбай — сауҙагәрҙәргә:] Ашап, бик якшы иткәнһегеҙ. Аждаһа тук кешеләрҙе бигерәк тә ярата ул* (Әкиәттән).

**2.** Аҙыҡ-түлек етерлек булған. *Тук итеү.* // *Тук йәшәү.* ■ *Урак өҫтө. Крәҫтиәндең ашлык йыйған миҙгеле. Ҡайһы бер емештәр ҙә бешкән... Был вакытта ауылдар тук була.* Д. Юлтый.

**3.** Эсе буш түгел, орлоҡ менән тулы. *Тук башак. Тук бойҙай.* ■ *Күптән арыш ем алған, башактар ярған, тук емдәрен күтәрә алмай, баштарын түбән һалған.* Д. Юлтый.

**4.** *күсм.* Тулыһынса ҡәнәғәт. *Уның [мулланың] күңеле тук, кәйефе якшы икәнлеге күренеп тора. Көлөмйөп, һаулык-иҫәнлек һораша, һүҙ һөйләй ине.* Ғ. Дәүләтшин.

◆ **Тук эсәк** *кар.* **эсәк.**

● *Астың күҙе икмәктә, туктың күҙе хикмәттә.* Мәкәл. *Илдең биле нык булһа, ирҙең күңеле тук булыр.* Әйтем.

**ТУҠ**[2] *окш.* Ҡаты нәмә менән ҡатыға һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Тук итеү.*

**ТУҠАЛ**[1] *с.* Мөгөҙө булмаған, мөгөҙһөҙ (һыйыр, кәзәгә ҡарата). *Тукал кәзә.* // *Сәрбиямалдың кыҙыл тукалы ла кайтып етте. Мөгөҙһөҙ башын аратаға тығып, капканы күтәреп кенә асты.* З. Биишева.

**ТУҠАЛ**[2] *и.* Көндәш ҡатындарҙың иң йәше. // *Тукал катын.* ■ *Инде хәҙер һылыу. Сәлимә тукал кәләш булып барасак. Уның башы хәҙер көнө-төнө көндәш ғазабында янасак.* С. Ҡудаш.

● *Тубылғынан өй булмаҫ, тукалдан тыуған бей булмаҫ.* Әйтем.

**ТУҠАЛАҠ** *с.* **1.** Ҡыйыҡһыҙ. *Тукалак өй.*

**2.** *күсм.* Яңғыҙ өйҙән башка бер нәмәһеҙ; ярлы. *Тукалак донъя.* // *[Бай:] Бер нәмәһе булмаған тукалактарҙы һайлап, эш сығамы.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТУҠАНАЙ** *с. диал. кар.* **төпөш**[1]. *Туканай кеше.*

**ТУҠАНЛАУ** *к. диал.* Туңҡанлау.

**ТУҠЛАНДЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **тукландырыу.**

**ТУҠЛАНДЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **тукландырыу.**

**ТУҠЛАНДЫРЫУ** *к.* Аҙыҡ менән тәьмин итеү; туйындырыу, ашатыу. *[Әсә:] Мин бер үҙем генә һеҙҙе кейендереү түгел, тукландыра ла алмайым.* Ш. Биҡкол. / Кәрәкле матдә менән тәьмин итеү; туйындырыу. *Үҫемлекте тукландырыу.*

**ТУҠЛАНЫУ** *к.* **1.** Аҙыҡланып, тереклек итеү, тамаҡ туйҙырыу. *Аҫ төрлө сыскан, бака, көшөл менән туклана.* К. Фәхретдинов.

**2.** Тәьмин ителеү. *Таныш йылғаһы күбеһенсә яуын-төшөм һәм шишмә һыуҙары менән туклана.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 12 май. / *күсм.* Ни менәндер талапты, кәрәкте ҡәнәғәтләндереү. *Башкорт әҙәбиәте .. халыктың бай ижады менән өҙлөкһөҙ тукланған.* М. Минһажетдинов.

**ТУҠЛЫ** *и. диал.* Туҡты.

**ТУҠЛЫҠ** *и.* **1.** Ашарға етеш хәл; аҙыҡ муллығы. *Көҙгө туклык.* ■ *Күҙ күреме ергә арыш баҫыуы йәйелгән. Бөтә тирә-йүндән туклык бөркөлөп тора.* Ф. Иҫәнғолов. *Ете йыл туклыкта батша тирә-яктағы ашлыкты йыйып, һаклык әҙерләп куйған* (Әкиәттән).

**2.** Туйҙырыр сифат. *Алмасылар алма ашай, алманың ни туклығы* (Халыҡ йырынан).

**ТУҠЛЫҠЛЫ** *с.* **1.** Яҡшы туйҙырыусан. *Туклыклы аҙык. Туклыклы аш.* ■ *— Ҡатык сәй ише буламы, туклыклы бит ул.* Һ. Дәүләтшина. *Яңы яҙған май туклыклы ла, үҙе тәмле лә.* Ғ. Амантай.

**2.** Тереклек өсөн кәрәкле матдәләре булған. *Туклыклы матдә.*

**ТУҠМАҠ**[1] *и.* **1.** Ниҙелер һуғып ҡаға, йомшата, иҙә торған һәлмәк ҡорал. *Кер тукмағы. Киндер тукмағы. Шыбағас тукмағы.* ■ *Бурәнә өҫтөндәге киндерҙе ике кыҙ ике тукмак менән алмаш-тилмәш һу[ға].* К. Мәргән. / *с. мәғ.* Шул ҡорал рәүешендәге. *Тукмак койрокло бәрәс. Тукмак танаулы кеше. Тукмак башлы улән.*

**2.** Уҫал айғырҙың маңлайына таға торған тимер.

**3.** *диал. кар.* **гер** 2. *Стеналағы тукмаклы сәғәт бер көйгә генә текелдәй.* Ж. Кейекбаев.

◆ **Сөй өҫтөнә тукмаҡ** *кар.* **сөй.**

**ТУҠМАҠ**[2] *и. һөйл.* Еңелсә туҡмауға ҡарата әйтелә. *Тукмак төшөү. Тукмак эләкте.* ■ *Илшаттың, .. бысранып кайткас, атаһынан тукмак алған мәлдәре лә булғылай.* А. Гирфанов.

**ТУҠМАҠЛАУ** *к.* Туҡмаҡ (1 мәғ.) менән туҡмау. *Ә кистәрен [ауыл кыҙҙары] киске тынлыкты яңғыратып, киндер тукмаклай.* Х. Мохтар.

**ТУҠМАЛАУ** *к. диал.* Туҡмаҡлау.

**ТУҠМАЛЫУ** *к. төш. кар.* **туҡмау.** *Тукмалған кеше.*

**ТУҠМАС** *и.* **1.** Ашҡа һалыр өсөн йоҡа ғына йәйеп, нәҙек оҙон итеп ҡырҡҡан сөсө ҡамыр. *Тукмас таҡтаһы. Тукмас баҫыу. Тукмас кыркыу.* / Шул ҡырҡыулы ҡамырҙы һалып бешергән аш. *Һөт тукмасы. Ит тукмасы. Тукмас бешереү.*

**2.** *и. диал. кар.* **уклау**[1] 1.

**ТУКМАСТАЯК** *и. диал. кар.* **уклау** [1] 1.

**ТУКМАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **тукмау.** *Кешене тукматыу.*

**ТУКМАУ** *к.* **1.** Яза өсөн нык-нык һуккылау. *Тукмап сығарыу. Тукмап ташлау. Канға батырып тукмау. Тукмап эшләтеү.* ■ *Шау-шыу китте. Ғәйни ағайҙы, бур тип, тукмай ҙа башланылар.* Т. Йәнәби. *[Аҫылғужа:] Арыта. Бөтә тән тукмап ташлаған кеүек.* Б. Бикбай. / *кусм.* Һуғышта кыйратыу. *Дошманды тукмау.*

**2.** Тукмак [1] (1 мәғ.) менән нык-нык һуғыу. *Кер тукмау.* ■ *Мәрйәм .. тукмак алып, киндер тукмарға тотона.* Н. Кәрип.

**ТУКМАШЫУ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **тукмау.** *Кер тукмашыу.*

**ТУКРАН** *и. диал.* Тумыртка.

**ТУКРАНБАШ** *и.* Куҙаклылар ғаиләһенә караған тумалак сәскәле, өсәрләп торған түңәрәк япраклы үлән. *Ал бүректәр кейгән тукранбаштар туғай кукләрен аллайҙар.* Х. Хәйри.

**ТУКРАУ** *к. диал.* Туктау.

**ТУКСЫЛЛЫК** *и.* Ашарға етеш хәл, туклык. *Хәҙер туксыллык, ни ашайым тиһәң, шул бар.*

**ТУКТАЛКА** *и.* Юлда туктай торған урын.

**ТУКТАЛЫУ** *к. кар.* **туктау.**

**ТУКТАЛЫШ** *и.* **1.** Эш-хәрәкәттәге вакытлыса туктап торған ара. *Тукталыш яһау.*

**2.** *кар.* **торак** 2.

**ТУКТАТЫУ** *к.* **1.** Кемдең йәки нимәләрҙең алға йүнәлгән хәрәкәтен киҫеү. *Бер урҙе менгәс, карт атын туктатып, хәл алдырҙы.* М. Тажи. / Эш-хәрәкәттән тындырыу. *Ашауҙан туктатыу. Бейеүҙән туктатыу. Моторҙы туктатыу. Сәғәтте туктатыу. Эште туктатыу.*

**2.** Ниҙеңдер барышын, ағышын өҙөү. *Бәхәсте туктатыу. Укыуҙы туктатыу. Һуғышты туктатыу.*

**ТУКТАУ** *к.* **1.** Алға йүнәлгән хәрәкәтте киҫеү. *Барып туктау. Етеп туктау. Килеп туктау. Туктап калыу. Туктап тороу.* ■ *Оҙак киттек. Туктау, ял итеү-фәлән юк.* А. Таһиров. *Зәлифә аттың туктауын да көтмәй, кырандастан һикереп төштө.* Ғ. Дәүләтшин. / Эш-хәрәкәттән тыныу. *Мотор туктаған. Станок туктаған. Сәғәт туктаған. Ашауҙан туктау. Бейеүҙән туктау. Уйындан туктау. Эштән туктау.* ■ *Беҙ пекарняла уҙ сменабыҙҙы тултырып, ял итергә туктағайнык.* Т. Йәнәби.

**2.** Ниҙеңдер барышы, булмышы өҙөлөү. *Бәхәс туктаны. Сауҙа туктаны. Тауыш туктаны. Укыу туктаны. Эш туктаны.* ■ *Капыл башланған акман-токман бураны капыл туктаны.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** Килеп төкәлеү, төкәлеп калыу. *Беҙҙең позицияның кайҙан башланып, кайҙа туктауы тураһында бер нәмә лә аңламайбыҙ.* Д. Юлтый. / Килеп тотолоу, тотолоп калыу. *Һис бер урында күңел туктарлык күренеш юк.* Д. Юлтый. *Фәниәм, кәҙерлем, Фәниәм, карашың кемдәрҙә туктаны.* М. Илбаев.

**4.** Вакытлыса килеп урынлашыу. *Гостиницала туктау.* ■ *Егет күп ер барғас, бер ҙур калаға етә. Кала ситендәге яңғыҙ йортта фатирға туктай* (Әкиәттән).

♦ **Бер туктамай** өҙлөкһөҙ; туктауһыҙ. *Бер туктамай һөйләү.* **Тукта[ғыҙ]** кешене ебәрмәй торғоҙорға теләгәндә әйтелә. *«Туктағыҙ, Фатима! — Кадир уның сумаҙан күтәргән кулынан кыҫып тотоп алды.— Иртәгә үҙем оҙатып куйырмын».* Б. Бикбай. / Бер нәмәгә кешенең иғтибарын тартырға теләгәндә әйтелә. *[Инспектор:] Шәхми ағай, һин, Ғәләү кустым, туктағыҙ әле, һеҙ мине кем тип уйлайһығыҙ?* Т. Йәнәби. / *инш. мәғ.* Бер нәмәгә үҙеңдең иғтибарыңды тупларға теләгәндә әйтелә.— *Тукта, былай ярамаҫ, бер аҙ формаһына килтерәйем.* Д. Юлтый. *Мөхлисә, Мөхлисә... Тукта, ниндәйерәк ине һуң әле ул?* М. Тажи.

**ТУКТАУҺЫҘ** *с.* Бер ҙә туктамаған. *Туктауһыҙ хәрәкәт. // Туктауһыҙ ағыу. Туктауһыҙ алға барыу. Туктауһыҙ үтеп тороу. Туктауһыҙ эшләү. Туктауһыҙ кәңәшмә уткәреү.* ■ *Бөгөн туктауһыҙ ямғыр яуа.* Т. Йәнәби.

**ТУК-ТУК,** тук та тук *окш.* Кабат-кабат тук иткән тауышты белдергән һүҙ. *Тук-тук итеү. Тук-тук килеү.* ■ *Улар бер-бер артлы тук та тук эре-эре баҫып, президиум өсөн әҙерләнгән өҫтәл янына килеп ултыра.* Ғ. Ғәйнуллин.

**ТУКТЫ** *и.* Һарык бәрәсе. *Калған аксаһына ул [Акназар] .. өлкән мал ала алмағанға, ике тукты, бер өлкән куй һатып алды.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Байҙың мең һарығы араһында ярлының йәтим туктыһын бүре алған.* Мәкәл.

**ТУКҺАН** *төп. һ.* 90 һаны. *Тукһан унға бүленә.* / Кем йәки нимәнеңдер 90-ға тиң иҫәбе. *Тукһан баш мал. Тукһан йыл. Тукһан йәш. Тукһан метр. Тукһанға етеү.*

♦ **Тукһан** туғыҙ бик күп. *Тукһан туғыҙ тапкыр әйтеү.* ■ *Малдар тукһан туғыҙ тауыш менән акыра.* Ш. Шаһәр.

● *Тукһан ауыҙ һүҙең булһа, тубыктай төйөнө булһын.* Мәкәл.

**ТУКҺАНЛАП** *сама һ.* Тукһанға якын, тукһан самаһы. *Тукһанлап кеше.*

**ТУКҺАНЫНСЫ** *рәт һ.* Урын тәртибе 90 менән билдәләнгән. *Тукһанынсы өй.*

**ТУКҺАНЫШАР** *бүл. һ.* Һәр бере тукһанға тиң. *Аксаны тукһанышар һумдан бүлеү.*

**ТУКҺЫНЫУ** *к.* Үҙеңдә тук һиҙеү. *Тәҙрәкәй төбө гөл дә емеш, ашағым да килмәй тукһынып* (Халык йырынан).

**ТУКЫЛДАТЫУ** *к.* Тук-тук иттереү, тук-тук килтереү. *Ишек тукылдатыу.* ■ *Һуҙҙәрҙе телеграфист аппаратта тукылдата башланы.* Р. Ниғмәти.

**ТУКЫЛДАУ** *к.* Тук-тук итеү, тук-тук килеү. *Тукылдығы сығыу.* ■ *Тукмак ағаска һуғылып тукылдап тора, ти* (Әкиәттән).

**ТУКЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **тукылдау.** *Тукылдашып ултырыу.*

**ТУКЫЛЫУ** [1] *к. төш. кар.* **тукыу** [1]. *Тукылған тауар.*

**ТУКЫЛЫУ** [2] *к. төш. кар.* **тукыу** [2]. *Тукылған катык.*

**ТУКЫМ** *и.* **1.** Эйәр аҫтына һала торған япма. *[Айһылыу:] Алтын, көмөш эйәрле, болғар тарткы, айыллы, тукымдары ынйылы, тибенгеһе сәмсәле.* «Урал батыр».

**2.** Эйәр аҫтындағы бөтә булған япма.

**ТУКЫМА** *и.* **1.** Тукылған тауар. *Ебәк тукыма. Йөн тукыма. Капрон тукыма. Кизе тукыма. Синтетик тукыма.*

**2.** Бергә берләшеп, бер үк функция үтәгән бер төрлө күҙәнәктәр төркөмө. *Мускул тукымаһы. Нервы тукымаһы.*

**3.** *күсм.* Ниҙәндер йөкмәткеһен, нигеҙен тәшкил иткән нәмә. *Операның музыкаль тукымаһы. Әҫәрҙең һүҙ тукымаһы.*

**ТУКЫТЫУ** [1] *к. йөкм. кар.* **тукыу** [1].

**ТУКЫТЫУ** [2] *к. йөкм. кар.* **тукыу** [2].

**ТУКЫУ** [1] *к.* **1.** Арҡау менән буйлыкты аралаш үткәреп, тауар йәки бүтән нәмә эшләү; һуғыу. *Тукыу станы. Тукыу промышленносы.* ■ *Ҡаҙаҡ катын-кыҙы .. төрлө төҫтәге йөндән кирәгә баштары, ҡурыйындар тукый.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** *диал. кар.* **үреү** [2] 2.

**ТУКЫУ** [2] *к.* **1.** Төйөр калдырмай шыйыклау өсөн ҡалаҡ менән ҡағып болғатыу. *Ҡаймаҡ тукыу.* ■ *[Әбей] Арыҫлангәлегә тип әҙерләп ҡуйған катыгын әллә нисә ҡабат ҡулына алып тукыны.* Ғ. Дәүләтшин. / Нимәгәлер аралаштырып болғатыу. *[Зөбәржәт] һөт менән йоморткага гына тукып ҡойған .. сөсө ҡоймаҡты майҙа йөҙҙөрөп, тәрилкә менән ашъяулыкка куйҙы.* З. Биишева.

**2.** *күсм.* Ҡабатлап-ҡабатлап әйтеү. *Тукып тороу.* ■ *Ә ҡыҙ хәлде аңламай, һаман үҙенекен тукый.* Н. Мусин. / Белеү өсөн ҡайта-ҡайта ҡабатлау. *Шиғырыңды укыным мин, укығанды тукыным.* М. Илбаев.

**ТУКЫУСЫ** *и.* Тукыма эшләгән эшсе. *Келәм тукыусы. Тукыусы булып эшләү.*

**ТУКЫШЫУ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **тукыу** [1].

**ТУЛА** *и.* Йөндән һуғып, кейеҙләп баҫҡан тукыма. *Тула баҫыу. // Тула бейәләй. Тула ойок. Тула салбар. Тула сәкмән.* ■ *Шәйхи бабай .. аҡ туланан тегелгән еләнен .. кейҙе.* Ғ. Хәйри. *Һарык көтһәң, йөнө була, йөнөнән тула була* (Таҡмаҡтан).

**ТУЛАЙ** *с.* Бөтә булған; дөйөм. *Тулай килем. Колхоз-ара ойошма төҙөлөштөң тулай планын үтәй.*

**ТУЛАЙЫ** *р.*, **тулайы менән** *диал.* Тотош, тулыһынса. *Ҡараболаҡ йылғаһы буйында буй үҫтереп киттем тулайы* (Сеңләүҙән).

**ТУЛАЙЫМ** *с.* **1.** Бөтә булған; дөйөм. *Ашлыктың тулайым төшөмө.*

**2.** Дөйөм күләмгә, күп һанға бәйле. *Тулайым хаҡ. // Тулайым алыу. Тулайым һатыу.*

**3.** *р. мәғ.* Тулыһынса, тотош. *«Шоңкар»ҙың сюжетына тулайым күҙ йүгертеп сығыу ҙа зарар итмәҫ ине.* К. Мәргән.

♦ **Тулайым алғанда** дөйөм алғанда.

**ТУЛАҠ** [1] *и.* **1.** Иләнмәй кипкән мал тиреһе (аяҡ аҫтына, тирмән аҫтына, урындыкка йәйгәндәр).

**2.** Үлгән быҙауҙың инәһен алдап әйҙәреү өсөн тиреһенә һалам тултырып эшләгән яһалма быҙау; толоп.

**ТУЛАҠ** [2] *с.* Бик насарланған, арыҡ (йылҡы малына ҡарата).

● *Ат арыһа — тулаҡ, ир арыһа — аруаҡ.* Мәкәл.

**ТУЛАҠЛАУ** *к.* Тулап һикереү. *Их, хушбыйлы йәшел яланда сәскәләргә күмелеп аунарга, шаян боландарҙай уйнаҡлап, тулакларга бейек тауҙарҙа!* Ғ. Амантай.

**ТУЛАРҺЫК** *и.* Малдың артҡы аяғының терһәге менән бәкәле араһындағы өлөшө. *Туларһык һөйәге.* ■ *[Аҡһаҡал:] Баш һөйәге — башлауга, туларһыгы — ташлауга.* «Ҡуңыр боға».

**ТУЛАТЫУ** *а. йөкм. кар.* **тулыу**. *Атты тулатыу.*

**ТУЛАУ** *к.* **1.** Үрле-ҡырлы һикереп, төрлө яҡҡа ташланыу. *Ат тулай.* ■ *Бер ҙур суртан һыу ситендә тулап ята, ти* (Әкиәттән). / *күсм.* Ныҡ шашып тибеү (йөрәккә ҡарата). *Уны [Гөлсирәне] күреү менән йөрәгем тулай башланы.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Тегеләй-былай аунау. *Тулап йоклау.*

● *Һыйыр тулаһа, аттан яман.* Мәкәл. *Һыйыр тулап, ат булмаҫ, катын тулап, баш булмаҫ.* Әйтем.

**ТУЛҒА** *и. диал. кар.* **өстаған** 2. *Көтөүсе тулгаһын ҡуйып, өҫтөнә сүлмәген ултыртып, һыу койоп, ярма һалып, ҡайнатырга куйҙы.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ТУЛҒАҠ** *и.* Бала тыуымға килгән саҡтағы ауыртыныу. *Тулгак тотоу.* ■ *Бала, тулгаҡ тота башлаганга теүәл бер тәүлек тулгас, тыуҙы.* А. Таһиров.

**ТУЛҒАНДЫРЫУ** *к.* Тегеләй-былай әйләндереү; аунатыу.

**ТУЛҒАНЫУ** *к.* Тегеләй-былай әйләнеү; аунау. *[Тәкбиров] төн уртаһы ауганса әйләнде лә тулганды.* Н. Мусин. *Юк тыныслык, тулганам да тулганам.* Ш. Бабич.

**ТУЛҒАТЫУ** *к.* Тегеләй-былай әйләндереү; тулғандырыу. *Ҡаҙаның каҫмаклы булһын, һыйырың башмаклы булһын, умырганың май булһын, тулгатканың ул булһын* (Туй йырынан).

**ТУЛҠЫН** *и.* **1.** Һыу өҫтөндәге сайҡалыш. *Диңгеҙ тулкыны. Тулкын кага. Тулкын тибә.* ■ *Пароходтар Иҙел буйлап бара бөҙрә тулкындарҙа тирбәлеп.* Ғ. Сәләм. / *күсм.* Рәүеше йәки хәрәкәте менән шул сайҡалышҡа оҡшаған хәл, күренеш. *Халык тулкыны. Ашлык өҫтөнән тулкын йүгереп үтте.* / *күсм.* Һауа хәрәкәтенә ҡарата. *Һауа тулкыны.* ■ *Алыҫта бомба ярылды, тулкыны бында килде.* Р. Ниғмәти.

**2.** *күсм.* Нимәнеңдер көслө һәм сағыу сағылышына ҡарата; ташҡын. *Көрәш тулкыны. Шатлык тулкыны. Революция тулкыны.* ■ *Ул да [Тимерғәле карт та] шундай ук һөйөү, шундай ук тойголар тулкыны эсендә һүҙһеҙ калган.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** *физ.* Физик мөхиттәге тирбәлеү хәрәкәте. *Радио тулкыны. Тауыш тулкыны. Электромагнит тулкыны.*

**ТУЛҠЫНДЫРЫУ** *к.* **1.** Тулҡындар (1 мәғ.) хасил итеү, хәрәкәткә килтереү. *Диңгеҙҙе тулкындырыу. Һауаны тулкындырыу.* ■ *Үлән баштарын саҡ кына тулкындырып, талгын ел иҫеп үтә.* Ф. Рәхимғолова.

**2.** *күсм.* Тынысһыҙ хәлгә килтереү. *Йөрәкте тулкындырыу.*

**ТУЛҠЫНЛАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Тулҡындар (1 мәғ.) хасил итеп сайҡалдырыу, тирбәлтеү. *Ел диңгеҙҙе тулкынландыра.*

**2.** *күсм.* Тойғоло, тынысһыҙ хәлдә нтеү; тулҡындырыу. *Йөрәкте тулҡынландырыу.*

**ТУЛҠЫНЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Тулҡын-тулҡын (1 мәғ.) булып тирбәлеү; сайҡалыу, тулҡыныу. *Тулҡынланып торған иген баҫыуы.* ■ *Ҡибла яҡтан ел иҫте, тулҡынланды ҡул өҫтө.* Ш. Бабич. / Тулҡынға оҡшаған йәки тулҡын рәүешендә булыу. *Тулҡынланып ятҡан тауҙар.* ■ *Аҙнагол Зөлхизәнең тулҡынланып торған оҙон, ҡалын толомдарын һүтеп тарата.* З. Биишева.

**2.** *күсм.* Тойғоло, тынысһыҙ хәлдә булыу; болоҡһоу, йөрәкһеү. *Йөрәк тулҡынлана. Күңел тулҡынлана. Тулҡынланып һөйләү.* ■ *Халыҡ тағы бер гөрләне, тағы бер тулҡынланды.* С. Агиш. *Бөтәһенән дә ныҡ тулҡынланып, яр башында баҫып торам мин.* Г. Юнысова.

**ТУЛҠЫНЛАТЫУ** *ҡ.* Тулҡынлы итеү; тулҡынландырыу. *Күлде тулҡынлатыу.*

**ТУЛҠЫНЛАУ** *ҡ.* Тулҡын булып тирбәлеү; тулҡынланыу.

**ТУЛҠЫНЛЫ** *с.* Тулҡыны бар. *Тулҡынлы һыу өҫтө. Тулҡынлы диңгеҙ.* / *күсм.* Тулҡынға оҡшаш рәүеш йәки хәрәкәттәге. *Тулҡынлы сәс.*

**ТУЛҠЫНЫУ** *ҡ.* **1.** Тулҡын-тулҡын (1 мәғ.) булып тирбәлеү, сайҡалыу, тулҡынланыу. *Тулҡынып ятҡан иген баҫыуы.* ■ *Диңгеҙ ҙә бит өҙлөкһөҙ тулҡына, ярһый, ажарланып, ҡаялар һыртына ынтыла.* З. Биишева. *Иҙел өҫтө сылбырланып тулҡынды ла тағы тынды.* М. Кәрим. / Тулҡын кеүек булыу, тулҡын рәүешендә булыу; тирбәлеү, тулҡынланыу. *Кремль өҫтөндә ал байраҡ тулҡынып яныл тора.* Р. Ниғмәти.

**2.** *күсм.* Тойғоло, тынысһыҙ хәлдә булыу; болоҡһоу, йөрәкһеү. *Тулҡынған күңел.* ■ *Тулҡыныуҙар, юҡһыныуҙар яратмаһаң, булмайҙыр.* Ҡ. Даян.

**ТУЛҠЫУ** *ҡ. диал.* Тулҡыныу.

**ТУЛМА** *и. диал.* Шешендергән ауырыу. *Тулма менән ауырыу.*

**ТУЛТЫРМА** *и.* Таҙаған үпкә, бауырға йәки иткә ярма ҡушып, тәм-том һалып, эсәккә тултырып бешергән ашамлыҡ. *Тултырма яһау. Тултырма бешереү. Тултырма ашау.*

**ТУЛТЫРТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **тултырыу.** *[Сәлих:] Ғәйшә туташ, осраған бер кешенән анкета тултыртып булмай.* С. Агиш.

**ТУЛТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **тултырыу.** *Иген тултырылған тоҡ. Кейем тултырылған һандыҡ.*

**ТУЛТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Һауыт кеүек нәмә эсенә һалыу. *Тапап тултырыу. Төйөп тултырыу. Тыңҡыслап тултырыу. Баллонға тултырыу. Кеҫәгә көнбағыш тултырыу. Ҡомғанға һыу тултырыу. Самауырға күҙ тултырыу. Сумаҙанға нәмәләрҙе тултырыу.* ■ *Бай Ҡаятау башынан төрлө-төрлө аҫыл таштарҙы ташлап торған, Оморҙаҡ уны кесерткән тоҡтарға тултырып торған, ти* (Әкиәттән). / Күп итеп ниҙер эсенә индереү, урынлаштырыу. *Ярым-ярты ҡаҙылған траншеялар эргәһенән йүгертә-атлата ҡыуаланылар ҙа еүеш, һай окоптарға тултырҙылар.* Д. Исламов. *Өй эсенә һалҡын тултырып, Яҡуп, Булат, Шәүәли һәм .. бер ҡарт килеп инде.* Б. Бикбай. *Беҙҙе илтеп тултырҙылар ҡуйы ҡара урманға* (Бәйеттән).

**2.** Һауыт кеүек нәмәнең эсен тулы итеү. *Тултырып ҡойоу. Тултырып һалыу. Күнәкте һыу менән тултырыу. Ҡаҙан тултырып аш бешереү. Сана тултырып бесән килтереү.* ■ *Кеҫәнән усты тултырып алып, сәтләүек бирҙем тегегә.* Т. Йәнәби.— *Иртәгә саҡлы ошо сапсаҡты [һыу менән] тултырмаһаң, йәнеңде алырмын!* (Әкиәттән).

**3.** Бөтә булған урын, майҙанды тулы итеү. *Баҫыу тултырып ашлыҡ сәсеү. Дәфтәр битен тултырып хат яҙыу.* ■ *Карттар түрҙән теҙелгән. Йәштәр урындыҡ ситен тултырып ултырған.* Һ. Дәүләтшина. *Йылҡыларың колонлап, яландарҙы тултырһын* (Туй йырынан).

**4.** Бөтә булған урын, майҙанды биләү, солғау. *Ура тауыштары залды тултырҙы.* ■ *Куропаткин генерал хәҙер ергә ултырған, Порт-Артурҙың тирәһен һалдат менән тултырған* (Бәйеттән).

**5.** Буш ҡалдырылған урынға кәрәкле мәғлүмәтте яҙыу. *Анкета тултырыу. Санаторий картаһын тултырыу.*

**6.** Билдәләнгән иҫәп, һанға еткереү. *Бәһлеүән Кейеҙбайҙы күргәс: «Ярай; иллегә бер кеше тулмай ине, һине йығып тултырырмын әйҙә»,— ти* (Әкиәттән).

**7.** Билдәле күләм, дәүмәлгә еткереү. *Планды тултырыу. Хеҙмәт көнөн тултырыу.* ■ *Беҙ сменабыҙҙы тултырып, ял итергә туҡтағайныҡ.* Т. Йәнәби.

**8.** Күпмелер йәште теүәлләү. *Ҡырҡ йәште тултырыу.* ■ — *Минең ҡыҙым бөгөн ун алтыһын тултырып, ун етегә китә.* С. Агиш.

**ТУЛТЫРЫУСЫ** *и.* Һөйләмдәге эш-хәрәкәт йүнәлтелгән әйәрсен киҫәк. *Ситләтелгән тултырыусы. Тура тултырыусы.*

**ТУЛТЫРЫШЫУ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **тултырыу** 1, 2, 5, 7. *Тоҡҡа картуф тултырышыу.*

**ТУЛЫ** *с.* **1.** Өҫтөнә, ситенә сыҡҡанса ниҙер һалынған йәки ҡойолған. *Тулы туҫтаҡ.* ■ *Сана кәйелеп китә лә тулы мискәләргә һыу сайпыла.* Б. Бикбай. *Баҫыуҙарҙа ашлыҡ ҡотороп уңған. Быйыл тулы булыр буралар.* М. Кәрим.

**2.** Урын, майҙанды тотош биләгән. *Келәт тулы иген. Кәртә тулы мал. Ҡаҙан тулы ит. Өй халыҡ менән тулы. Урам тулы кеше.* ■ *Ана аяҡ аҫты тулы көртмәле, түйғанса аша.* М. Тажи. *Ишеккәйем алды ай күлгенәм томбойоҡтар менән тулы икән* (Халыҡ йырынан).

**3.** Бөтә булмышты биләгән. *Эсең-тышың тулы сеп-сей ялған менән.* Ш. Бабич. *Алһыу йөҙкәйҙәрем ай һарғайҙы күңелем тулы ҡайғы уй менән* (Халыҡ йырынан).

**4.** Бөтә булмышы менән ғәмәлләшкән. *Тулы бәхет. Тулы итеп күҙ алдына килтереү.* ■ *Ул үҙе өндәшмәһә лә, .. бик кәрәкле бер нәмәһе етешмәгән, әллә нимәһе тулы булмағанын күрергә мөмкин ине.* Ғ. Дәүләтшин. *Ул кешенең күңеле таҙа булһа, тормошо тулы булыр* (Әкиәттән).

**5.** Бер ни менән сикләнмәгән, ҡыҫылмаған. *Тулы демократия. Тулы хоҡуҡ.* ■ *Батшалыҡты ҡолатмай тороп, беҙгә тулы ирекҡә ирешеү мөмкин түгел.* Һ. Дәүләтшина.

6. Билдәле бер иҫәп, самаға тотош еткән. *Тулы бер эш көнө. Тулы өлөш.* ■ *[Кооператив] Аҡназарҙың алам тигән нәмәләрен арзан хаҡ менән бирҙе лә ҡалғанына тейерен аҡсалата тулы боло менән түләп ебәрҙе.* Ғ. Дәүләтшин.

7. Бөтә булған тейешле өлөш, киҫәктәрҙе эсенә алған. *Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы.* / Бөтә нәмәне тейешенсә эсенә алған. *Тулы йөкмәтке. Тулы яуап. Тулы итеп әйтеү.* ■ — *Һөйләүселәрҙең һүҙен протоколға тулы итеп теркәй барығыҙ.* М. Тажи.

8. Иң ҙур күләм, дәүмәлдәге. *Тулы ай.* ■ *[Ҡатын] тулы күҙҙәрен тултырып, иренә ҡараны.* Б. Бикбай.

9. Иң юғары кимәлдәге. *Тулы көс. Тулы сифат. Техниканы тулы ҡеүәтендә эшләтеү.*

10. Итләс, йомро. *Тулы беләк. Тулы тән.* ■ *Нина тиреһенә һыя алмай йөрөгән тулы, ҡып-ҡыҙыл битле ҡыҙ ине.* Д. Юлтый. / Оҙон ҡуйы ҡыллы. *Тулы ҡойроҡ.* ■ *Ял, ҡойроғо тулы тип, ябайҙан айғыр алмағыҙ* (Ҡобайырҙан).

♦ Донъя тулы бик күп. *Вәхши күҙ, шаҡшы күңел, алдаҡсы тел донъя тулы.* Ш. Бабич.

● *Хәйерсенең ҡуйыны тулы икмәк.* Әйтем.

**ТУЛЫҠ** *с. диал.* Тулы.

**ТУЛЫҠҺЫУ** *ҡ. иҫк.* Тулҡынланыу.

**ТУЛЫЛАНДЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **тулыландырыу.** *Класс китапханаһы яңы китаптар менән тулыландырыла.*

**ТУЛЫЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Өҫтәп, тулыраҡ итеү. *Музей экспонаттарын тулыландырыу. Эшселәр синыфын тулыландырыу.* ■ *Һирәгәйеп ҡалған роталарҙы резервтан килгән ярты меңләп кеше менән тулыландырҙылар.* Д. Юлтый.

**ТУЛЫЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Өҫтәлеп, тулыраҡ хәлгә килеү, тулыраҡ булыу. *Һуңғы йылдарҙа беҙҙең музыка байлығыбыҙ йәнә тулылана төштө.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 3 ғинуар.

2. Итләс, йомроға әйләнеү; йомро булыу. *Зөләйхаға күҙ һалам. Ит ҡуныр, кәүҙәгә тулыланып киткән.* Н. Мусин.

**ТУЛЫУ** *ҡ.* **1.** Һауытҡа һ. б. төшөп йыйылыу. *Булмәгә төтөн тулды.* ■ *Соҡорға тулған һыу күсәрҙән аша һуҡты.* М. Тажи. *Ел менән осҡан көл танауға, ауыҙға, күҙгә тулып тора.* Ғ. Дәүләтшин. / Күп булып, эркелеп, ниҙер эсенә инеү, инеп урынлашыу. *Урамға килеп тулған халыҡ.* ■ *Беҙҙең окопҡа икенсе бер полк һалдаттары килеп тулды.* Д. Юлтый.

2. Өҫтөнә, ситенә сыҡҡанса ҡойоулы, һалыулы булыу. *Аҡъял батыр шундағы сүмес менән ике тапҡыр һыу алып, ҡунәгенә ҡойған икән, ҡунәк тулып та ҡуйған* (Әкиәттән). / Бөтә булған урын, майҙанды алыу, тотош биләү. *Халыҡ өйгә инеп, урындыҡҡа, мейес эргәләренә теҙелде, солан тулды.* Һ. Дәүләтшина.

3. Күп булып, бөтә урын, майҙанға таралыу. *Зөлхизә өсөн йәнен-йөрәген йәлләмәҫ бына тигән егеттәр тулып йөрөй ҙә баһа!* З. Биишева.

4. Билдәле иҫәп, һанға етеү.— *Көндөҙ келәткә ревизия яһанылар, ике йөҙ ботлап иген тулмай.* Б. Бикбай. *Айыуҙар ун башҡа тулғас, егет уларҙы әйләп алып китте, ти* (Әкиәттән).

5. Билдәле бер күләм, дәүмәлгә етеү. *План тулды.*

6. Күпмелер йәшкә етеү. *Утыҙ йәш тулды.* ■ *Егерме өсө лә тулмаҫ элек тол ҡалған китек күңелле ҡатынды рәнйетер өсөн күпме генә кәрәк.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТУЛЫҺЫ:** тулыһы менән тулы көйө, тулыһынса, тотош. *[Ҡатын:] Атаһы, хоҙай биргән икән, быны<br>ң гөшөрөн Тәукәй муллаға тулыһы менән бирербеҙ инде.* Т. Йәнәби.

**ТУЛЫҺЫНСА** *р.* **1.** Тулы көйө, бөтөнләйе менән; тотош. *Тулыһынса биреү. Тулыһынса файҙаланыу.* ■ *Ир һәм ҡатын ғаилә мөнәсәбәттәренә тулыһынса тиң хоҡуҡлы.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**2.** Бөтөнләйе менән, еренә еткереп. *Тура ҡырҡа һүҙҙәрҙән бигерәк, ҡубеһе кинәйәләрҙән торған был көрәште Гөлйөҙөм тулыһынса аңлай алманы.* Һ. Дәүләтшина.

**ТУЛЫШЫУ** *ҡ.* **1.** Ныҡ тулып, ҡабарыу; ташыу. *Тулышҡан йылға. Тулышып ағыу.* ■ *Елене тулышҡан сыбар һыйыр, сығып һауыуҙарын көтөп, зарланып баҡырҙы ла баҡырҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

2. Көс, һут йыйып, тиртеү. *Тирә-яҡта дымлы ер һәм тулышҡан бөрө еҫтәре аңҡый.* Ә. Вәли. *Тау итәгендә, үлән һирәгерәк урындарҙа, ер еләге ҡыҙыл булып, тулышып бешкән.* Ф. Әсәнов.

3. Итләс, йомро хәлгә килеү; тулы булыу. *Бит алмалары тулышҡан. Сикә тамырҙары тулышҡан.* ■ *Сәйҙел ишкәк ишә. Тулышып сыҡҡан мускул иттәре.* Ғ. Сәләм.

4. *күсм.* Көс, ғәйрәт, сәләмәтлек, асыу, ҡыуаныс һ. б. менән тулы булыу; ташыу. *Өмөткә тулышыу. Шатлыҡ менән тулышыу.* ■ *Ҡыҙҙың күңеле ниндәйҙер билдәһеҙ хистәр менән тулыша башланы.* Х. Ғиләжев.

**ТУМАҠАТАН: тумаҡатан әйләнеү** *диал.* тәкмәс атыу (*ҡар.* **тәкмәс**).

**ТУМАЛАҠ** *с.* **1.** Бөтә яғы түңәрәк, һәр яҡлап йомро. *Тумалаҡ төймә.* ■ *Тумалаҡ тауҙың башында ала ҡарға юрғалай* (Халыҡ йырынан).

2. Тулы итле, һимеҙ, йомро. *Тумалаҡ бит.* ■ *Тимербулатты бәләкәйерәк кенә ҡара тумалаҡ атҡа мендерҙеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**ТУМАЛАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Тумалаҡҡа әйләнеү, тумалаҡ булыу. *Тумалаҡланып бөткән ваҡ таштарҙы тулҡындар һаман төгөрләтә.* И. Насыри.

**ТУМАЛАНЫУ** *ҡ. диал.* Тумалыу.

**ТУМАЛАТЫУ** *ҡ. диал.* **1.** Йомарлау.

2. Тәгәрләтеү.

**ТУМАЛАУ** *ҡ. диал.* **1.** Йомарланыу.

2. Тәгәрләү, тәкмәсләү.

**ТУМАЛСАЙ** *и.* Тумалаҡ ҡына нәмә; йомарсаҡ. *Сәғиҙә .. Ғималетдиндең .. сәйнәгәндә ҡаҡса елкәһенең шыма тиреһе аҫтында ҡыбырлаған тумалсайға ҡыҙыҡһынып ҡарап ултырҙы.* Ш. Янбаев.

**ТУМАЛЫУ** *ҡ.* **1.** Емеш булып яралыу. *Тумалған алма. Тумалған бәрәңге.* ■ *Яңы ғына тумалған томбойоҡҡа оҡшаш был гәжәп көрешәкте мин бик оҙаҡ әйләндереп, тулғандырып ҡарап ултырам.* З. Биишева.

2. *кусм.* Башланғыс алыу; яралыу. *Тәү мөхәббәт тумала башлаған, ҡанатлы ҡоштай, шатлыҡ кисергән көндәре әле лә иҫендә Нәғимәнең.* Б. Бикбай. *Хыялымда йәйге тын кистәрҙең сабыр күркәмлеге тумалды.* Ә. Таһирова.

**ТУМА́Н** [*рус.* ⟨*фарс.*] *и.* Ирандағы аҡса берәмәге.

**ТУМАНАҠ** *и.* Сатыр сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған оҙонсараҡ япраҡлы, һары сатыр сәскәле эре үлән.

**ТУМАР** *и.* Һаҙлыҡта сурайып ултырған өҫтө үләнле суҡаҡ; түңгәк. *[Дружинниктар] урыны-урыны менән һаҙлыҡта үҫкән тумар өҫтөнән һикерҙеләр.* Я. Хамматов. *Аналыҡҡай буйы сәсле тумар, яҙғы үрткә яныл, көл булһын* (Халыҡ йырынан).

**ТУМАРЛАҠ** *и. кар.* **йомарлам.**

**ТУМАРЛАНЫУ** *к.* Тумалаҡ хәлгә килеү; тумалаҡланыу. *Ҡайһылай баҙыҡ атлай ул [Фатима]! Балтырҙарының һум иттәре, йоҙроҡтай тумарланып, тығыҙ тартыла.* Б. Бикбай.

**ТУМАРЛАУ** *к.* Тумалаҡ-тумалаҡ булып таралыу. *Тумарлап яткан ҡауын.* ■ *[Емеш] мейестә тумарлап ятҡан уле күмерҙәрҙе берәм-берәм тотоп, йомшаҡ йүкә күмерен әҙләп алды.* З. Биишева.

**ТУМАРЛЫҠ** *и.* Тумар күп булған ер; түңгәклек. *Беҙҙең генә йылға ай тумарлыҡ, тумарлыҡта ҡаҙҙар кунарлыҡ* (Халыҡ йырынан).

**ТУМАСА** *и. кар.* **тыумаса.**

**ТУМБО́ЧКА** [*рус.*] *и.* Ғәҙәттә карауат янына ҡуйыла торған бәләкәй генә тәпәшәк шкаф. *Карауат башындағы тумбочкала китаптар өйөләп ята.* М. Тажи.

**ТУМБЫҒЫУ** (тумбыҡ*ғ*) *к.* Ойоған, туңған кеүек булып иҫһеҙләнеү; тумбыу. *Аяҡ тумбығып киткән.* ■ *Мәхмүзә апайҙың һыйырҙар эргәһенә көҙгө ҡырауҙа яланаяҡ сыҡҡан саҡтары ла, бармаҡтарының тумбығып, ҡаҙ тәпәйе кеүек ҡып-ҡыҙыл булған мәле лә күп булды.* Т. Сәғитов.

**ТУМБЫТЫУ** [1] *к.* Ойоған, туңған кеүек итеп иҫһеҙләндереү.

**ТУМБЫТЫУ** [2] *к. диал.* Кинәйәләү, төрттөрөү. *Тумбытып әйтеү.*

**ТУМБЫУ** *к.* Ойоған, туңған кеүек булып иҫһеҙләнеү; тумбығыу. *Баш тумбып тора.* ■ *Операция оҙаҡҡа һуҙылған ваҡыттарҙа аяғы тумбып, арманһыҙ булып арыһа ла врач хеҙмәтенән биҙмәне.* «Ағиҙел», 1974, № 1.

**ТУМЖЫҠ** *с. диал.* Тыржыҡ. *Тумжыҡ танау.*

**ТУМПАЙТЫУ** *к.* Йомро итеп ҡабартыу. *Ауыҙҙы тумпайтыу.*

**ТУМПАЙЫУ** *к.* **1.** Йомро булып ҡабарыу. *Бите өрөлөп бешкән ҡабартма шикелле, тумпайып тора.* Ф. Иҫәнғолов.

2. *кусм.* Асыу, үпкә белдереп, ауыҙҙы ҡабартыу. *Тумпайып ултырыу.*

**ТУМПАҠ** *с.* Йомро ғына булып ҡабарған. *Тумпаҡ бит.*

**ТУМПЫШ** *с.* Йыуан, ҡыҫҡа кәүҙәле. *Тумпыш кеше.*

**ТУМРАЙЫУ** *к. диал. кар.* **томһайыу** 2.

**ТУМРАНЛАУ** *к.* Тубыҡты яҙылдырмай, иңкәйә биреп, саҡ ҡуҙғалыу. *Тумранлап атлау. Тумранлап йөрөү.*

**ТУМРАУ** *и.* Тумырып, сабып алған бер өлөш, бер киҫәк. *Бер тумрау ит. Бер тумрау ағас.*

**ТУМТАЙЫУ** *к. диал.* Тумпайыу. *Тумтайып тороу. Тумтайып ултырыу.*

**ТУМҺАЙЫУ** *к. диал.* Томһайыу.

**ТУМЫРТҠА** *и.* Оҙон үткер суҡышы менән ағасты соҡоп тапҡан ем менән туҡлана торған урман ҡошо. *Ала тумыртҡа. Йәшел тумыртҡа. Ҡара тумыртҡа. Турғай тумыртҡа.* ■ *Ҡыуарған ағас ҡабығын суҡып тишкеләп бөтә. ..Исеме уның тумыртҡа.* С. Кулибай.

◆ **Тумыртҡа баланы** ҡауырһын япраҡлы, күк ҡыңғырау сәскәле үлән. **Тумыртҡа тәүбәһе** *кар.* **тәүбә.**

**ТУМЫРТҠАБАШ** *и. кар.* **туҡранбаш.**

**ТУМЫРТЫУ** *к. йөкм. кар.* **тумырыу.** *Ағас тумыртыу.*

**ТУМЫРЫҠ** *с.* Йыуан, ҡыҫҡа кәүҙәле. *Дусмәт тумырыҡ ҡара айғырын менеп алды.* Б. Хәсән.

**ТУМЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **тумырыу.** *Тумырылған ағас.*

**ТУМЫРЫУ** *к.* Ике яҡлап сабып ҡырҡыу. *Хәйретдин ҡарағай осон тумырып өҙҙө.* Я. Хамматов. / Киҫәк-киҫәк итеп китеү. *Күкрәтеп Урал күкрәген, шахталарҙа руда тумыралар.* Ғ. Амантай.

**ТУН** *и.* **1.** Тиренән теккән ҡышҡы өҫ кейеме. *Баса тун. Бүре тун. Бәрән тун. Илтер тун. Йорон тун. Күрпә тун. Ҡама тун. Тейен тун. Тире тун. Төлкө тун. Тышлы тун.* ■ *Сәғиҙә .. ҙур яғалы һары тунды кейҙе.* М. Тажи. *Аҡ ҡуянкайҙарҙан тун тектерҙем, тышҡынайын ниҙән тышлайым* (Халыҡ йырынан). **Аҡ тун** буялмаған тун. **Ҡыптыр тун** иләнмәгән тире тун. **Тамаҡ тун** төлкөнөң тамаҡ тиреһенән тегелгән тун.

2. *иҫк.* Өҫ кейеме.

◆ **Ата туны** ҡыҙҙың атаһына кейәү бирә торған бүләк. **Аяҡ тун** *диал.* йорон салбар. **Инә туны** ҡыҙҙың инәһенә кейәү бирә торған бүләк. *Ул [Заһит] кәйнәһе алдына инә туны итеп ун аршин ҡулдәклек һалып күреште.* Һ. Дәүләтшина.

**ТУНА** *и. диал.* Туҡмас таҡтаһы.

**ТУНАЛЫУ** *к. төш. кар.* **тунау.**

**ТУНАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **тунау.** *Тире тунатыу.*

**ТУНАУ** *к.* **1.** Мал, йәнлектең тиреһен һыҙырыу; һуйыу. *Сәйҙән һуң Фәхри бер һарыҡ һуйып, тунап бирҙе ағайға.* Б. Бикбай. *Һунарсы бер ҡуян атып алып ҡайтып, тиреһен тунап, киргегә кейҙереп ҡуйған, ә итен ҡаҙанға һалған, ти* (Әкиәттән).

2. *диал.* Мөнтәү. *Сәсте тунау.*

◆ **Ете ҡат** (*йәки* **әнә менән) тирене тунау** *шул уҡ* **терелэй тирене тунау** (*кар.* **тире** [1]).

**ТУНАШЫУ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **тунау.** *Һарыҡ тунашыу.*

**ТУ́НДРА** [*рус.* ⟨*фин.*] *и.* Арктик бүлкәттең ҡырыҫ тәбиғәтле, үҫемлеккә бик ярлы мәңге туң көньяҡ өлөшө. *Тундра ҡайыны. Тундрала йәшәү.*

**ТУНЕ́Ц** [*рус.*] *и.* Алабуғалар ғаиләһенә ҡараған бик эре йыртҡыс диңгеҙ балығы.

**ТУННЕ́ЛЬ** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* Ер аҫтынан соҡоп үткәрелгән юл. *Туннелдән үтеү. Туннель юлы.*

**ТУҢ I** *с.* **1.** Һыуыҡҡа ҡатҡан. *Туң батҡаҡ. Туң бейәләй.* ■ *Ат тояҡтары ғына туң ерҙә таҡылдап, тынлыҡты боҙа.* Б. Бикбай. *Ташлы тупраҡ нисектер туң кеүек ине. Етмәһә, дөгө ярмаһындай ваҡ ҡына борсаҡ яуа.* Ә. Вахитов. / Өҫтө йоҡа боҙ менән ҡапланған. *Туң иҙән.* ■ — *Тәҙрә туң, бер нәмә лә күренмәй.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Йылы хис, тойғоһоҙ; яғымһыҙ, ҡаты. *Туң күңелле кеше. Йыр ул туң йөрәкте лә иретә. Әмир уның ауылда ҡалыуын Маһира шулай туң күңел менән ҡабул итер тип уйламағайны.* Х. Ғиләжев. *Ҡараған һайын Тәкбировтың туң сырайына йылмайыу йәйелә барҙы.* Н. Мусин.

**3.** *күсм.* Аңлау, төшөнөү һәләте самалы. *Туң кеше.* ■ *[Кунакбаев:] Минең баш һинекенә ҡарағанда аңлыраҡ та, белемлерәк тә. Һин бына, туң баш, бер нәмә лә белмәй ҡысҡыраһың.* Б. Ишемғол.

**4.** *күсм. диал. ҡар.* **сей**[1] 2.

II *и.* **1.** Ниҙеңдер һыуыҡҡа ҡатҡан хәле, торошо. *Итте һыуыткыстан алып, мясорубканан үткәреү алдынан туңын сығарыу. Яҙғы ҡояш ныҡ ҡыҙҙырып, ерҙең туңын тиҙ бөтөрҙө.* / Ниҙеңдер өҫтөндә барлыҡҡа килгән боҙ ҡатламы. *Мәктәп тәҙрәләрендәге туң ҡыш башланғаны бире ирер тә ҡарағаны юк.* Н. Мусин.

**2.** Һыуытып, аяҡ аҫты ҡатҡан мал; туңғаҡ[2]. *Иртәнге туң. Киске туң.*

◆ **Ҡара туң** *шул уҡ* **ҡара туңғаҡ** (*ҡар.* **туңғаҡ**[2]). **Туңға һөрөү** яҙын ашлыҡ сәсеү өсөн көҙҙән һөрөү. *Иртә туңға һөрөү.* **Туң май** *ҡар.* **май**[1] 2.

● *Алты ай ҡыштың алты туңы була.* Әйтем. *Байҙың ете туң, ярлының ите туң.* Әйтем. *Ер туңы ҡояш йылыһынан ирей, күңел туңы моңға ирей.* Әйтем.

**ТУҢАҘЫТЫУ** *к.* **1.** Әҙ генә туңдырыу. *Ерҙе туңаҙытып, еллә тәүге ҡар яуып торған мал ине.* Н. Мусин.

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **туңаҙыу.**

**ТУҢАҘЫУ** *к.* Әҙ генә туңыу. *[Хаммат] иртүк, ер туңаҙыған саҡта, ат эйәрләп менә лә, ауылдарға сығып китә, төнләтеп, юл туңаҙығас ҡына ҡайтып килә.* З. Биишева.

**ТУҢҒАҘАҠ** *с.* Әҙ генә туңған. *Аҡбәкәл.., тояҡтарын туңғаҙаҡ юлда уйнатып, ярһып елә.* С. Кулибай.

**ТУҢҒАҘАҠЛАНЫУ** *к.* Туңаҙаҡҡа әйләнеү, туңғаҙаҡ булыу; туңаҙыу .

**ТУҢҒАҠ**[1] *с.* Ҡар яумай туңған. *Туңғаҡ ер.*

**ТУҢҒАҠ**[2] *и.* Һыуытып, аяҡ аҫты туңған мал. *Иртәнге туңғаҡ.* ■ *[Әхмәҙиҙе] сәйгә лә, ашҡа ла, балға ла саҡырҙылар, сөнки ул көҙгө туңғаҡта ҡайтып килде. Ә был ваҡытта Ташбатҡан ауылында өй беренсә тиерлек һуғым һуялар.* Ж. Кейекбаев.

◆ **Күк туңғаҡ** ҡар өҫтөн туңдырған яҙғы һыуыҡ. *Беҙ иртәнге күк туңғаҡта Ғиниәтулла ағайымдарҙы оҙатырға станцияға бармаҡ булдыҡ.* Й. Солтанов. **Ҡара туңғаҡ** көҙгө ҡарһыҙ һыуыҡ.

**ТУҢҒАҠЛАНЫУ** *к.* Туңғаҡҡа әйләнеү, туңғаҡ булыу. *Ҡар туңғаҡланған.*

**ТУҢҒАЛАҠ**[1] *с. диал. ҡар.* **туңғаҡ**[1].

**ТУҢҒАЛАҠ**[2] *и. диал. ҡар.* **туңғаҡ**[2].

**ТУҢҒЫР** *окш ҡар.* **дуңғыр.**

**ТУҢДЫРМА** *и.* Ҡаймаҡ, һөт, еләк-емеш һуты һәм башҡа нәмә ҡушып туңдырған татлы ашамлыҡ. *Еләк туңдырмаһы. Ҡаймаҡлы туңдырма. Шоколадлы туңдырма. Туңдырма ашау.*

**ТУҢДЫРТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **туңдырыу** 1—3

**ТУҢДЫРЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **туңдырыу** 1—3.

**ТУҢДЫРЫУ** *к.* **1.** Һыуыҡҡа ҡатырыу. *Май туңдырыу.* / Өҫтән йоҡа боҙ менән ҡаплау. *Һыуыҡ ел тәҙрәне туңдырҙы.*

**2.** Ныҡ өшөтөү.

**3.** *күсм.* Хис, тойғоһоҙ итеп ҡатырыу; хисһеҙләндереү. *Шулай инде заман .. йә яндырып, йә туңдырып үтә бәғерҙе.* Н. Нәжми.

**4.** *эйһ. ф. ҡар.* **туңыу** 1. *Оҙаҡ ямғырҙан һуң ҡапыл туңдырып ебәрҙе, аяҡ аҫты тайғаҡланды.* С. Агиш.

**ТУҢҠАЙТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **туңҡайыу.**

**ТУҢҠАЙЫУ** *к.* Ҡул менән таянып, билдән бөгөлөү. *Туңҡайып тороу.*

**ТУҢҠАНБАШ** *р. диал.* Баш түбән. *Туңҡанбаш китеү.*

**ТУҢҠАНЛАУ** *к.* **1.** Бер туңҡайып бер ҡалҡыу. *[Ҡуян] ҡапыл туҡтаны. Ҡолаҡтарын ҡарпайтып, ниҙер тыңланы. Туңҡанлап аҙыраҡ барҙы ла тағы туҡтаны.* Я. Хамматов.

**2.** Иңкәйә биреп, алпан-толпан баҫыу. *Туңҡанлап атлау.*

**ТУҢҠАНЛАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **туңҡанлау.**

**ТУҢЛЫҠ** *и.* Ерҙең туң, һыуыҡҡа ҡатҡан хәле. *Ер өҫтөндәге туңлыҡ кеше, ат аҙымдары, тәгәрмәстәрҙән иҙелеп, тигеҙлеген юғалта.* С. Агиш.

**ТУҢЫУ** *к.* **1.** Һыуыҡҡа ҡатыу. *Май туңа. Һыу туңа. Ер туңа.* ■ *Көн бик һыуыҡ. ..Түкөргән төкөрөк тә ергә төшкәнсә туңып өлгөрә.* Т. Хәйбуллин. / Өҫтән йоҡа боҙ менән ҡапланыу. *Ҡырҡ ҡораулы тәҙрәләр, көслө елдең өрөүенә түҙмәй, көйөҫ-көйөҫ сылтырап китә. ..Туңмай ҡалған урындарҙан .. ел уйнап тора.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Ныҡ өшөү. *Тышта, һыуыҡ буранда руҙа таң аттырҙым туңған көйөмә.* Ғ. Амантай.

**3.** *күсм.* Хис, тойғоһоҙ булып, ҡатыу; хисһеҙләнеү. *Күңел туңа.* ■ *Йөрәгең туңғандыр ул һинең, Ғәбитхан ҡустым, шулай булмаһа, бынау балаларға ул тиклем һалҡын ҡарамаҫ инең!* К. Мәргән.

**ТУП**[1] *и.* Берәй материалдан эсе бөтәш йәки ҡыуыш итеп яһалып, ҡаты нәмәгә бәргәндә ғәҙәттә һикерә торған шар. *Ағас туп. Йөн туп. Резина туп. Футбол тубы. Туп тәгәрләтеү.* ■ *Ял көндө мәктәп балалары Ямал тауы итәгендә туп уйнаны.* Ә. Вәли. *Айыуғолаҡ имән оронан туп, ботағынан сәкән яһап, урамға туп һуғырға сыҡҡан* (Әкиәттән).

◆ **Мәргән туп** уйын исеме (ике-өс метр бейеклектәге бағана башына туп һыйырлыҡ дүңгәләк ҡағыла; уйнаусылар билдәле аранан туп ырғыта; тубы дүңгәләк үтә төшмәгән кеше уйындан сыға бара, иң аҙаҡҡа ҡалған кеше еңеүсе була).

**Соҡор туп** уйын исеме (теҙеп кенә туп һыйырлыҡ бер нисә соҡор ҡаҙыла; һәр кеше үҙ соҡоро тәңгәлендә сүкәйеп ултыра; көтөүсе соҡорҙар буйлатып туп тәгәрләтә; кемдең соҡорона туп барып төшә — шул уны ала һалып, ҡасып өлгөрмәгән бер кешегә бәрә; туп тейһә, бәргән кешегә бер мәрәй яҙыла; кем иң элек тейешле мәрәй һаныи йыя — шул еңеүсе була). **Сәпәмә туп** уйын исеме (уйнаусылар ике төркөмгә бүленә; шыбағала осҡа сыҡҡан төркөм һуғыусы була, икенсе төркөм — көтөүсе; шунан һигеҙ-ун метр аралыҡта ике сик һыҙылып, ике араға көтөүселәр төркөмө баҫа; икенсе төркөм теҙелеп тороп, бер сиктән икенсе сиккә йүгереп барып әйләнергә тырыша; көтөүселәр һуҡҡан тупты тота һалып, йүгергән кешегә бәрә; туп тейгән һәр кеше уйындан сыға бара). **Урта туп** уйын исеме (бер яҡ туп бәрә, икенсеһе ике һыҙыҡ уртаһында йөрөп, тупты тейҙермәҫкә тырыша; туп тейгән һәр кеше уйындан сыға бара). **Ямғыр туп** уйын исеме (ҡыҫҡа ғына ҡаҙыҡ ҡағыла, башына туп ултыртыла; туп эргәһендә бер көтөүсе була, башҡа кешеләр туптан ун аҙым самаһы алыҫлыҡтағы һыҙыҡтан тороп, таяҡ менән берәм-берәм тупҡа бәрә; таяғы теймәгән кеше һыҙыҡ артында көтөп тора; берәй кеше тейҙерә һуғып, туп осоп китһә, һәр кем үҙ таяғын алырға йүгерә, ә көтөүсе тупҡа йүгерә; таяғын алып та, көтөүсенән алда ҡаҙыҡ башына төртөп өлгөрмәгән кеше көтөүсе була, бер кеше лә тупты бәреп осора алмаһа, көтөүсе тупты алып, бер таяҡҡа табан тәгәрләтә; туп таяҡҡа тейһә, таяҡ хужаһы көтөүсе була).

**ТУП**[2] *и. иҫк.* **1.** Төрлө калибр һәм төҙөлөштәге оҙон көбәкле артиллерия ҡоралы; пушка. *Ауыр туп. Тупҡа тотоу. Туптан атыу.* ■ *Беҙҙең пулемёттар эшкә башланы. Туптар немец окобына ут асты.* Д. Юлтый.

**2.** Шул ҡоралдан ата торған шартлағыс нәмә; снаряд. *Шартлай ине дошман тубы, үтә алмай ҡоросто.* Ә. Вәли.

**ТУП**[3] *и.* **1.** Күмәк булып бергә йыйылған кеше йәки башҡа нәмә; төркөм. *Буре тубы. Ҡош тубы. Бер туп халыҡ. Тупҡа йыйылыу.*

**2.** Бер ырыу эсенә ингән яҡын туғандар төркөмө; ара.

**ТУП**[4] *окш.* Тос нәмә ҡатҡыл ергә ҡапыл төшкәндә һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Туп итеү.* ■ *[Булат:] Еңгәм түбән ҡараған арала ғына алдына туп итеп һикереп төштөм.* К. Кинйәбулатова.

**ТУП-** *киҫ.* Ту*ᵦ* ижеге менән башланған төп сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһе бирә. *Туп-тулы. Туп-тумалаҡ. Туп-тупаҡ. Туп-тура.*

**ТУПАЙТЫУ** *ҡ.* **1.** Туп кеүек итеп бүлтәйтеү; туптайтыу. *Ауыҙҙы тупайтыу.*

**2.** Ҙур итеп асыу (күҙҙе). *Күҙҙе тупайтыу.*

**ТУПАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Туп кеүегерәк булып бүлтәйеү; туптайыу. *Ауыҙы тупайып тора.*

**2.** Түп-түңәрәк, ҙур булып асылыу (күҙгә ҡарата). *Ауыл халҡы белгеһе килеп, күп нәмәне һорай. Беҙ ни, күҙебеҙ тупайып, бер нәмә лә әйтә алмай ҡарап ултырабыҙ ҙа ҡалабыҙ.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТУПАҠ** *с.* **1.** Осо йомро; осло түгел. *Тупаҡ башлы тау. Тупаҡ башлы таяҡ.* ■ *Икеһе лә түңәрәк ҡыҙыл йөҙлө, ҙур ғына тупаҡ танаулы, .. ерән мыйыҡлы кеше ине улар.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** *диал. ҡар.* **тупар** 1. *Тупаҡ балта.*

**3.** *диал.* Тҡалаҡ. *Тупаҡ өй.*

**ТУПАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Тупаҡҡа әйләнеү, тупаҡ (1 мәғ.) булыу. *Тупаҡланған тау.*

**ТУПАҠЛАУ** *ҡ.* Тупаҡҡа әйләндереү, тупаҡ (1 мәғ) итеү. *Таяҡтың башын тупаҡлау.*

**ТУПАЛАҠ** *с. диал.* Тупанай.

**ТУПАЛАМ** *и. диал. ҡар.* **тупалан** 1.

**ТУПАЛАМА** *и. диал. ҡар.* **тупалан** 1.

**ТУПАЛАН** *и.* **1.** Йоғошло мал ауырыуы; ҡырғын.— *Алланыҡын кем белгән, ҡапыл килеп тупалан тейһә, малың бер көндә юҡ була ла ҡуя ул.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *диал.* Быуын шеше.

**ТУПАЛСАЙ** *и. ҡар.* **тупалсаҡ.**

**ТУПАЛСАҠ** *и.* Ниҙеңдер осо йәки өҫтөндәге тумалаҡ ҡына нәмә. *Сәйгүн ҡапҡасының тупалсағы.*

**ТУПАН** *с.* Тумалаҡ, йомро. *Тупан баш малай. Тупан баш уҡ.*

**ТУПАНАЙ** *с.* Йомро итләс кәүҙәле. *Тупанай бала.*

**ТУПАНАҠ** *и. диал.* Сүмесбаш.

**ТУПАР** *с.* **1.** Йөҙө йәки осо үткер түгел; үтмәҫ, тупаҫ. *Тупар балта. Тупар бысаҡ.*

**2.** *диал.* Тупаҡ, тупан. *Тупар баш.*

**ТУПАРЛАНЫУ** *ҡ.* Тупарға (1 мәғ.) әйләнеү, тупар булыу. *Тупарланған балта.*

**ТУПАРЛАУ** *ҡ.* Тупарға (1 мәғ.) әйләндереү, тупар итеү; үтмәҫләү. *Балтаны тупарлау.*

**ТУПАРЫУ** *ҡ.* Тупарланыу, үтмәҫләнеү.

**ТУПАҪ** *с.* **1.** Тупар, үтмәҫ. *Тупаҫ кәйлә.*

**2.** Ямаҡ төҫ, һынлы; күркәм түгел, нәфис түгел. *Өйрәнсек һаман шул тупаҫ, йәмһеҙ балсыҡ көршәктәрен эшләгән.* З. Биишева. *Мин һамар ягының кыҙҙарын беләм. Улар тупаҫ, йыуан балтырлы була.* Д. Юлтый. / Эре итеп эшләүле. *Тупаҫ буҫтау.*

**3.** *күсм.* Килешһеҙ, ҡаты ҡылыҡ, мөнәсәбәтле; ҡырыҫ. *Тупаҫ мөғәмәлә. Тупаҫ һүҙ. // Тупаҫ һөйләшеү.* ■ *Ғимайға тупаҫ итеп, ҡабат өндәшмәҫлек итеп яуап биргеһе килде Хәтирәнең.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТУПАҪЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Үтмәҫкә әйләндереү; үтмәҫ итеү. *Ит сабып, балтаны тупаҫландырыу.*

**2.** *күсм.* Ҡырыҫҡа әйләндереү. *Аяуһыҙ ҡанлы һуғыш күңелде тупаҫландыра кеүек ине.* Т. Сәғитов.

**ТУПАҪЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Үтмәҫкә әйләнеү, үтмәҫ булыу; үтмәҫләнеү. *Салғылар тупаҫланып бөткән, артыҡ ыратыр хәл ҡалмаған. Бабай Шомбайҙы ҡайраҡ алып килергә ҡайтарып ебәргән* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Йомшаҡ ҡылыҡ, тойғоно юғалтыу, ҡырыҫҡа әйләнеү. *Тупаҫланған күңел ҡапыл ҡыҙыу тимергә һалған боҙ кеүек ирене, күңел йомшаны.* Д. Юлтый.

**ТУПАҪЛАУ** *ҡ.* Тупарлау, үтмәҫләү. *Балтаны тупаҫлау.*

**ТУПАҪЛЫҠ** *и.* Тупаҫ мөғәмәлә, тупаҫ ҡылыҡ. *«Нимә карайһың?» — тип ҡаты ғына өндәште береһе. Дәмин, уның тупаҫлығына илтифат та итмәй, арьяҡҡа китте.* Ә. Вахитов.

**ТУПИК** [*рус.*] *и.* Бер осо дауамһыҙ барып бөткән тимер юл тармағы; тоҡон юл. *Приют станцияһы. Тауар поездары туктай. Унда вагондарҙы ысҡындырып, тупикка ҡыуалайҙар.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 1 март.

**ТУПЛАМА** *и. ҡар.* **тупланма.**

**ТУПЛАНМА** *и.* Тупланған аҡса. *Промышленноста тупланмаларҙың размерын кубәйтеу.*

**ТУПЛАНЫУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **туплау** [1]. *Тупланған аҡса. Тупланған тәжрибә.*

**2.** Күмәкләп бер урынға йыйылыу. *Тупланған халыҡ.* ■ *Аҡһаҡ ҡола аяғы менән ерҙе сапсып, кешенләп ебәреүгә бөтә өйөр уның эргәһенә туплана.* «Аҡһаҡ ҡола».

**3.** Күмәкләп берләшеү.— *Әгәр ауыл ярлылары бергә тупланып, берәүенән ат, икенсеһенән һабан, өсөнсөһөнән кеше көсө алып, бер табандан эшләһә, игенде еңел сәсерҙәр ине.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТУПЛАНЫШ** *и.* Нимәнеңдер күпләп йыйылған урыны.

**ТУПЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **туплау** [1].

**ТУПЛАУ** [1] *к.* **1.** Төркөм итеп йыйыу, төркөмгә йыйыу. *Малды туплау.* ■ *Беҙҙе һаман бер урынға туплайҙар.* Д. Юлтый. *Айғыр .. аттарҙы һөрөп, тирмә янына туплап ҡайта* (Хикәйәттән).

**2.** Йыйып берләштереү. *Халыҡты колхозға туплау.* ■ *Бүләр хан да ғәскәр туплай башлаған, ти. Ғәскәренә баш итеп Алпамыша батырҙы ҡуйған, ти.* «Алпамыша».

**3.** Бер эш, маҡсатҡа берләштереү. *Актив туплау. Кәңәш туплау.* ■ *Тимер бөтә ярлы-ябағаны үҙ тирәһенә туплап алды.* Б. Бикбай. / Бер йүнәлешкә килтереү. *Аҡылды туплау. Иғтибарҙы туплау.* ■ *Дәреслектә яҙған һәр һөйләмдең мәғәнәһен төшөнөргә тырышып, егет бөтә зиһенен туплаңы.* Я. Хамматов.

**4.** Йыйып-йыйып күбәйтеү. *Аҡса туплау. Байлыҡ туплау. Мәғлүмәт туплау.* ■ *Был немецтар башҡорт ярлыларының ерендә башҡорт ярлыһының ҡулы менән байлыҡ йыйған, уларҙың әсе тире, ҡаны арҡаһында мөлкәт туплаған.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТУПЛАУ** [2] *и.* Мал йыйылып ята торған еләҫ, күләгә урын; саңлау. *Ул [Тайфур], көн эҫетә башлағас, малды туплауға төшөрә.* Р. Ғабдрахманов.

**ТУПЛЫ** *с. диал.* Өйөрлө, йыйын. *Туплы алйот. Туплы бала-саға.*

**ТУПРАҠ** *и.* **1.** Ерҙең өҫкө йомшаҡ ҡатламы. *Көлһыу тупраҡ. Ҡара тупраҡ. Тупраҡтың уңдырышы. Тупраҡты йомшартыу.* ■ *Ерҙең бысраҡҡа мансылып, ҡара тупрағы әйләнеп ятҡан [көҙгө] заман.* Ғ. Дәүләтшин. *Мәхшәр көнө етмәй үлмәҫ инем, серемәҫ инем тупраҡ аҫтында.* Ш. Бабич. *Ҡыпсаҡ ырыуының аҙаматтары Бабсаҡ батырҙы ерләмәк була. Ләкин Ҡарағөлөмбәт «Еремде ҡаҙытмайым, еремдән тупраҡ бирмәйем..!» — тип, мәйетте ерләргә рөхсәт бирмәй.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**2.** *күсм.* Билдәле бер урын, ер. *Тыуған тупраҡ.* ■ *Әсәйем ошо ауыл тупрағында ятып ҡалды.* Н. Мусин.

♦ **Ауыр тупрағы еңел булһын** үлгән кешегә теләк итеп әйтелә.

**ТУПРАҠСА** *и.* **1.** Өй бураһының өрләктән өҫтә ятҡан иң өҫкө бүрәнәһе. *Ул [Әбүбәкер] манаранан мәсеттең ҡыйығына төштө. .. Тиҙҙән, бесәй шикелле, бер ҡабырғаһын тупраҡсаға терәп, ғырылдап йоҡоға талды.* Р. Ғабдрахманов.

**2.** *диал.* Түбә тупрағы.

**ТУПСАНЛАУ** *к.* Ауырлыҡ менән атлау, аяҡҡа саҡ-саҡ баҫыу. *[Хәбирә:] «Атаҡ, минең аяғым да ҡалай ойоп киткән»,— тип, тупсанлай-тупсанлай урындыҡтан төшөп, ҡаталарын кейҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**ТУПСЫ** *и.* Туптан атыусы. *Ҡарлас арьяғында ике орудие тора, улар янында тупсыларҙан башҡа кеше юҡ.* Б. Хәсән.

**ТУПСЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **тупсыу** [1].

**ТУПСЫТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **тупсыу** [1].

**ТУПСЫУ** [1] *к.* Ҡатлап-ҡатлап бер урынды йүрмәү. *Тупсып тегеү.*

**ТУПСЫУ** [2] *и.* Һөйәктең тупалсаҡ башы.

**ТУПСЫУЫР** *и. диал. ҡар.* **тупсыу** [2].

**ТУПҪА** *и. ҡар.* **тупһа.**

**ТУПТАЙ** *с.* Һауһаҡ, теремек. *Гөлбикә еңгә бала табыу менән исем алған кеше. ..Уның тыуған бер балаһы туптай булып үҫә лә китә.* Д. Юлтый.

**ТУПТАЙТЫУ** *к.* **1.** Туп кеүек итеп ҡабартыу; тупайтыу. *Һыу уртлап, ауыҙҙы туптайтыу.*

**2.** Түп-түңәрәк, ҙур итеп асыу (күҙҙе); тупайтыу. *Күҙҙе туптайтып ҡарау.*

**ТУПТАЙЫУ** *к.* **1.** Түп кеүек булып бүлтәйеү; тупайыу. *Ауыҙы туптайып тора.*

**2.** Түп-түңәрәк, ҙур булып асылыу (күҙгә ҡарата); тупайыу. *Күҙе туптайған.*

**ТУП-ТУП, туп та туп** *окш.* Ҡабат-ҡабат туп иткән тауышты белдергән һүҙ. *Туп-туп итеү. Туп та туп килеү.* ■ *Эре тамсылар ярыша-ярыша, туп та туп тама башланы.* Р. Назаров.

**ТУПТЫР** *окш.* Тумалаҡ ҡаты нәмәләр күп булып ҡойолғанда һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Туптыр итеү.*

**ТУПТЫРАУ** *к. ҡар.* **туптырлау.**

**ТУПТЫРЛАТЫУ** *к.* Туптыр-туптыр иттереү, туптыр-туптыр килтереү. *Ел алмаларҙы ағасынан туптырлатып ҡоя.*

**ТУПТЫРЛАУ** *к.* **1.** Туптыр-туптыр итеү; туптыр-туптыр килеү. *Туптырлығы сығыу.*

**2.** *ҡар.* **тубырлау** [2].

**ТУПҺА** *и.* **1.** Ишек йәки тәҙрә тирәсенең аҫҡы өлөшө. *Ишек тупһаһы. Тәҙрә тупһаһы* ■ *Өлкәман .. урам тәҙрәһен асҡан, тупһаһына терһәген ҡуйып, яңағына таянған да көҙгө күренеште күҙәтеп ултыра.* Ш. Насыров. / *күсм.* (ғәҙәттә «кеше» һ. б. һүҙҙәр менән). Өй, ғаилә. *Ғүмер буйы кеше тупһаһында йөрөп булмай бит. Ҡасан булһа ла үҙ ояңды ҡоророға тура килә.* Б. Хәсән. *[Ғариф:] Элек кенә э теге ни, байҙар тупһаһында йөрөгән саҡта, беҙгә һан юҡ ине ул.* Б. Бикбай.

**2.** *күсм.* Ниҙеңдер алды, башланған урыны; рубеж. *Ләкин был — белем тупһаһын тәү башлап аша атлау ғына әле.* Б. Бикбай. *Үлем туп-*

*һаһына баҫҡанда ла уны [Әбдрәзәковты] үлем ситләтеп үтә.* Һ. Әсәдуллин.

**3.** Һыу төбөндәге таш һикәлтә.

**4.** Ишек күгәнен ултырта торған сөйлө тимер. *Мирсәй ағай ишектең тутығып бөткән тимер тупһаларын алмаштырҙы.* Ә. Вәли.

♦ **Тупһа тапау** инеп-сығып, килеп-китеп күп йөрөү. *Бер йыл буйы был күҙғатылған мөһим мәсьәләне вөжүдкә сығарыу тураһында Мәскәүҙең тупһаларын байтаҡ тапарға тура килде.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**ТУПҺЫҘ** *с.* Оялыу, тартыныуҙы белмәҫ; әҙәпһеҙ. *Тупһыҙ кеше.*

**ТУПҺЫҘЛАНЫУ** *к.* Тупһыҙға әйләнеү, тупһыҙ булыу.

**ТУПЫЙ**[1] *и.* **1.** Әбейҙәрҙең шәл, яулыҡ аҫтынан кейә торған һырыулы сөм түбәтәйе.

**2.** *диал.* Бүрек.

**ТУПЫЙ**[2] *с. диал.* Тупыс.

**ТУПЫЙ**[3] *и. диал.* Ҡуянтубыҡ.

**ТУПЫЛДАТЫУ** *к.* Туп-туп иттереү, туп-туп килтереү. *Сәрби инәй Зөфәрҙең арҡаһынан тупылдатып һөйөп алды.* Д. Бүләков. *[Петров] уң аяғы менән бер-ике тапҡыр иҙәнгә тупылдатып алды ла талғын, ләкин етеҙ аҙымдар менән бейеп китте.* Ә. Вәли.

**ТУПЫЛДАУ** *к.* Туп-туп итеү, туп-туп килеү. *Тупылдығы сығыу.* ■ *Өй артында үҫкән карағайҙарҙың тубырсығы тупылдап ергә ҡойола.* Ж. Кейекбаев. *Өй эргәһендә көҙгө тамсылар тупылдай. Бәлки улар таңға тиклем тамыр.* С. Агиш. *Төнгө тынлыҡта оло юл буйлап юртҡан ат тояғының тупылдауы оҙаҡ ҡына ишетелеп торҙо.* М. Тажи.

**ТУПЫЛДАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **тупылдау.**

**ТУПЫРЛАУ** *к. ҡар.* **тубырлау**[2].

**ТУПЫРСЫҠ** *и. диал.* Ат бәкәленең тышау һала торған урыны.

**ТУПЫР-ТУПЫР** *окш. ҡар.* **тубыр-тубыр.**

**ТУПЫС** *с.* Өҙөлөп ҡыҫҡарған (бармаҡҡа ҡарата). *Тупыс бармаҡ.* ■ *Кемдер шунда күрешергә тупыс ҡулын һуҙҙы аранан.* Б. Бикбай.

**ТУР**[1] *и.* Ҡош, йәнлек тота торған ау. *Ҡуян туры.*

● *Ир яңылышып, ҡулға төшөр, ҡош яңылышып, турға төшөр.* Әйтем.

**ТУР**[2] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Вальс бейегәндә бүлмә урата бер әйләнеш. *Вальс туры.*

**2.** Эштәге бер этап. *Конференция эшенең беренсе туры.* / Күп баҫҡыслы һайлау системаһының айырым этабы. *Президент һайлауҙың икенсе туры.* / Ярыштың, конкурстың һ. б. унда ҡатнашыусылар бер генә сығыш яһай ала торған бер өлөшө. *Спорт олимпиадаһының һуңғы туры. Чайковский исемендәге конкурстың беренсе туры.*

**ТУР**[3] [*рус.*] *и.* **1.** Нәҫеле ҡороған ҡырағай үгеҙ.

**2.** Кавказдағы тау тәкәһе. *Тур мөгөҙө.*

**ТУРА**[1] *с.* **1.** Берәй йүнәлешкә бер тигеҙ тартылған; кәкре түгел; төҙ. *Тура һыҙыҡ.* ■ *Ҡыл тартҡан кеүек тура юл көньяҡҡа ҡарап китте лә китте.* Ж. Кейекбаев. / Ситтән урамаған, тапҡыр йүнәлешле. *Тура һуҡмаҡтан ҡайтыу.* // — *Юл буйлап йөрөмәгеҙ. Сусаҡ тауҙың ҡырласынан юлһыҙ тура тартығыҙ.* Һ. Дәүләтшина. / Көмрө түгел, көмрәймәгән; төҙ. *Тура кәүҙәле.* // *Тура ултырыу.* ■ *Теүәлбай үҫкән, атаһы кеүек төҙ кәүҙәле, ҡара туры тулы йөҙлө, үткер күҙле, төҙ танаулы, тура яурынлы.* Ғ. Дәүләтшин. *Хәл шаҡтай яҡшырҙы. Тик кәүҙәне генә тура тоторға ярамай. Гел кәкрәйеп кенә йөрөргә кәрәк.* С. Агиш.

**2.** *р. мәғ.* Аралағы урын, ергә ҡағылмай. *Тура эшкә китеү.* ■ *Ауылға ҡайтып еткәс, өйөнә лә һуғылып тормай, бригадир тура колхоз идараһына барҙы.* Б. Бикбай.

**3.** Фекерҙе, тойғоно һ. б. асыҡтан-асыҡ белдергән. *Тура һүҙле кеше. Тура яуап.* // *Тура яуап биреү.* ■ *Хәйбулла ағай тура телле,— тиеште колхозсылар,— кемдең кем булыуына ҡарамаҫтан әйтә.* К. Мәргән. *[Йәмилә:] «Балам, һинең атайың Ҡарағөлөмбәт түгел, Бабсаҡ инеа,— тип, Күсәктең һорауына яуап бирә.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**4.** Дөрөҫ, ысын, тоғро булған. *Тура юлға төшөрөү.* ■ *Беҙҙә һәр кем алға атлай тура, яҡты юл менән.* Н. Иҙелбай. // *[Ишмырҙа:] Ҡулдан килгән хеҙмәтте батша хәҙрәттәренән аямайбыҙ инде уны! Нисек кенә булһа ла, тура хеҙмәт итергә тырышабыҙ инде!* Д. Юлтый.

**5.** Үҙгәртелмәгән, төп; *киреһе* күсмә. *Һүҙҙең тура мәғәнәһе.*

♦ **Тура килеү** 1) ярашлы булыу, ярау. *[Карт:] Шул инде: һабы тура килһә — йәбе тура килмәй, йәбе килһә — һабы килмәй.* Д. Исламов; 2) тап килеү; осрау.— *Ошондай түй осорона тура килеп тә, һеҙ ҡунаҡ булмағас, беҙ ҡунаҡ итмәгәс, ул ни эшкә ярай.* Ғ. Дәүләтшин. *Үҙенә күрә квартира ла табылды... Алыҫлығын алыҫ, ләкин арзанға тура килде.* С. Агиш; 3) кәрәк булыу, ирекһеҙҙән мәжбүр булыу. *Яҙға табан миңә һалдатҡа ҡарала барырға тура килде.* Т. Йәнәби.

● *Тура һүҙгә яуап юҡ.* Әйтем. *Тура әйткән туғанына ярамаған.* Әйтем.

**ТУРА**[2] *и.* Кем йәки нимәгәлер ҡаршы ятҡан урын; тәңгәл, тапҡыр. *«Волга» беҙҙең туранан уҙыбыраҡ туҡтаны.* Н. Нәжми.

**ТУРА**[3] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Башня рәүешендәге шахмат фигураһы исеме.

**ТУРА**[4] *и. диал. ҡар.* **әжекәй** 1.

**ТУРАҒА** *р.* Тура йүнәлеш менән. *Тураға сығыу.* ■ *Агиҙел тураға алыҫ түгел. Баҡса уның ярына барып терәлгән.* Я. Хамматов.

**ТУРАҒЫС** *и.* Ниҙе лә булһа турай торған машина йәки ҡорамал. *Ит турағыс. Силос турағыс. Һалам турағыс.*

**ТУРАЙТТЫРЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **турайтыу.**

**ТУРАЙТЫУ** *к.* Тура[1] (1 мәғ.) итеү. *Юлды турайтыу.* ■ *Оркестр уйнай башлағас, В. Зөбәйеров уҙе лә һиҙмәҫтән кәүҙәһен турайтып, хәрби кешеләр һымаҡ атлап китте.* Р. Низамов.

**ТУРАЙЫУ** *к.* Тура[1] (1 мәғ.) хәлгә килеү. *Юл турайҙы. Турайып ултырыу.* ■ *Бабай турайып, атлап китер сакта, ҡапыл билен тотоп, ергә һеңде.* К. Кинйәбулатова.

**ТУРАҠЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **тураҡлау.**

**ТУРАҠЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **тураҡлау.**

**ТУРАҠЛАУ** *к.* Ваҡ-ваҡ итеп ҡырҡҡылау; сапҡылау. *Алманы тураҡлау. Һаламды тураҡ-*

лау. ■ *Акмырҙа .. дейеүҙең кәүҙәһен тураклап, күбәләй итеп өйөп куйған, ти* (Әкиәттән).

**ТУРАКЛАШЫУ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **тураклау.**

**ТУРАЛА** *бәйл.* Эйәлек килештәге 1, 2 зат алмаштары, төп килештәге күрһәтеү алмаштары менән уй, һүҙ объекты булған кеше йәки нәмәне билдәләү өсөн кулланыла; хакта. *Минең турала. Һеҙҙең турала. Был турала. Шул турала.* ■ *Сәгиҙә уны Зыя хакында ла һорашырмы икән, тип көтөп ултырғайны, ләкин Рәшиҙә ул турала ләм-мим һүҙ әйтмәне.* М. Тажи.

**ТУРАЛАУ** *к.* **1.** Тура[1] (1 мәғ.), төҙ итеү. *Балта осталары шифер астына такта сөйләй башлаған, ләкин такталары туралап сабылмаған, араларында йоҙрок һыйырлык ярыктар калған.* «Совет Башкортостаны», 1968, 30 июль.

**2.** Тура[1] (2 мәғ.) йүнәлтеү; төбәү. *Туралап барыу. Туралап бәреү.* ■ *Бөтә кояш нурын коя кеүек ошо картка ғына туралап. «Һаумы, акһакал!» — тип исәнләшә барса халык уны ололап.* Т. Арслан.

**3.** Тура[1] (2 мәғ.) йүнәлеш алыу; төбәлеү. *Дилми ағай капканан сыккас та Сафаларға туралаңы.* Р. Ғабдрахманов.

**ТУРАЛЫКЛЫ** *с. кар.* **тоғролоклo.** *Туралыклы кеше. Туралыклы булыу.*

**ТУРАЛЫУ** *к. төш. кар.* **турау.** *Туралған ит.*

**ТУРАМ** *и. кар.* **турамыс.** *Бер турам ит.*

**ТУРАМЫС** *и.* Тураған кисәк. *Бер турамыс ит.*

**ТУРАМЫСЛАУ** *к.* Кисәк-кисәк итеп кырккылау; турау. *Хужаның катыны турамыслап кына карын-карта бешергән булған икән.* Ж. Кейекбаев.

**ТУРАНАН-ТУРА** *р.* **1.** Ниндәйҙер башка бер эш-хәлгә, урын-ергә кағылышһыҙ; туп-тура. *[Зыя:] Бәлки туранан-тура фронтка оҙатмастар әле, бер нисә лагерҙа булырға, әҙерлек үтергә тура килер.* М. Тажи.

**2.** Йәшерен тормай, асыктан-асык. *Туранан-тура әйтеү. Туранан-тура һорау.*

**ТУРАУ** *к.* **1.** Кисәк-кисәк итеп кырккылау, бүлгеләү, сапкылау. *Бәрәңге турау. Икмәк турау. Һалам турау.* ■ *Емеш каҙандан табакка алып һалынған итте .. турарға кереште.* З. Биишева. *Аттарға бесәнде турап, болғатып бирә башланылар.* Б. Бикбай.

**2.** *күсм.* Сапкылап үлтереү. *[Малай:] Кара әле, калай турайҙар тегеләрҙе [актарҙы]... Бөтә тау буйы үлек менән тулған.* Р. Ниғмәти.

**ТУРАҺЫНДА** *бәйл.* Эйәлек килештәге 3 зат берлек алмашы, төп килештәге исем, 3 зат күплек алмашы һәм шуға тап килгән башка алмаштар менән уй, һүҙ объекты булған кеше йәки нәмәне билдәләү өсөн кулланыла; хакында. *Уның тураһында. Тегеләр тураһында. Кеше тураһында. Укыу тураһында.* ■ *Бабайҙың оло улы бөгөн күргән төшө тураһында нисек һүҙ башларға белмәй ултыра, ти* (Әкиәттән).

**ТУРАШЫУ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **турау.** *Ит турашыу.*

**ТУРБАШ** *и.* Өйҙөң аш-һыу әҙерләй торған яғы, каҙан яғы. *Малайҙар турбашта ултыра. Алдарында катык.* Ә. Вахитов.

**ТУРБИНА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Пар, газ, һыу энергияһын механик эшкә әйләндерә торған әйләнмәле хәрәкәт иткән роторлы двигатель. *Пар турбинаһы. Һыу турбинаһы.*

**ТУРБОБУР** [*рус.*] *и.* Тәрән нефть һәм газ скважиналарын бырау лай торған касаулы гидравлик двигатель. *Турбобур менән бырау лау.*

**ТУРБОВИНТЛЫ** [*рус.* турбовинтовой] *с.* Пропеллеры газ турбинаһы менән әйләндермәле. *Турбовинтлы самолёт.*

**ТУРБОГЕНЕРАТОР** [*рус.*] *и.* Пар йәки газ турбинаһы менән әйләндерелә торған электр энергияһы генераторы.

**ТУРБЫ** *и. кар.* **торба**[2].

**ТУРҒАЙ** *и.* **1.** Сыбар көрән һыртлы, буҙ корһаклы вак кош. *Урам уртаһындағы ат тиҙәктәрендә турғайҙар соксона.* Х. Мохтар. **Алакас турғай** башы, койроғо кара, корһағы ак, түше һарғылт кыҙыл, канаты ала төстәге урман турғайы. **Ашлык турғайы** *диал.* һабан турғайы. **Балыксы турғай** оҙон төҙ сукышлы, кыҫка койроклo, йәшел һыртлы һыу буйы турғайы. **Буҙ турғай** *диал. кар.* **һабан турғайы. Буран турғайы** *диал.* кыҙылтүш. **Ерек турғайы** һарғылт йәшел төстәге вак урман турғайы. **Көйәҙ турғай** аклы-һарылы, һарылы-көрәнле ала төстәге һайрар турғай. **Камыш турғайы** һорғолт һыртлы, акһыл корһаклы, ак кашлы һыу буйы турғайы. **Кантүш турғай** *диал.* кыҙылтүш. **Карабаш турғай** кара башлы, һары корһаклы, йәшкелт һыртлы турғай. **Карағай турғайы** карағай тубырсығын кауҙап ашай торған каушырма сукышлы, атаһы кыҙғылт, инәһе йәшкелт турғай. **Кашка турғай** күкшел һыртлы, кыҙыл койроклo, ак кына кашкалы турғай. **Кыҙылтүш турғай** *кар.* **кыҙылтүш. Майсыл турғай** *диал. кар.* **карабаш турғай. Мышар турғайы** яҫы ғына супайлы күкшел һыртлы, койрок осо һары һыҙатлы эре турғай. **Себен турғайы** буҙ һыртлы, сыбар йәки ак корһаклы вак турғай. **Сук турғай** *кар.* **бараба. Тал турғайы** йәшкелт йәки һорғолт буҙ һыртлы, һарғылт йәки һорғолт ак корһаклы, һарғылт кашлы вак турғай. **Тарма турғайы** көрән һыртлы, буҙ түбәле, кыҙыл түшле вак турғай. **Таш турғайы** буҙ һыртлы, кара канат, койроклo турғай (таш егенә оялай). **Һабан турғайы** күккә менеп һайрай торған һорғолт буҙ һыртлы эре турғай; буҙ турғай. **Һарысай турғай** һырты һор, башы, корһағы һарғылт төстәге һайрар турғай. **Һоло турғайы** *кар.* **Һарысай турғай. Һыртлан турғай** күкшел буҙ һыртлы, түбәһенән койроғона тиклем буҙ һыҙатлы, сыбар корһаклы турғай (ағас кыуышында оялай). **Һыу турғайы** һыу төбөнә төшөп, ем эҙләй торған ала турғай. **Шыршы турғайы** шыршы тубырсығын кауҙап ашай торған каушырма сукышлы, атаһы кыҙғылт, инәһе йәшкелт төстәге турғай.

**2.** Һәр төрлө вак кош.

♦ **Турғай башындай** бәләкәй нәмәне ҙур итеп күрһәткәндә әйтелә. *Турғай башындай еләк.* **Турғай тубығынан** *кар.* **тубык**[1].

**ТУРИЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ял итеү һәм ил белеү максатында кайһы сакта спорт элемента-

ры менән берлектә ойошторолған сәйәхәт. *Спорт туризмы. Тау туризмы.*

**ТУРИСТ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Туризм менән шөғөлләнгән кеше. *Ул [Әхмәҙулла] күптән инде, путёвка һатып алам да турист булып берәй сит илдә йөрөп ҡайтам әле, тип һөйләнгән була торғайны.* Р. Солтангәрәев. *Иртүк сыҡты улар юлға, хәҙер инде кис. Атаһынан ҡалмай атлай бәләкәй турист.* Г. Юнысова.

**ТУРИСТИК** *с.* Туризмға мөнәсәбәтле. *Туристик база. Туристик лагерь. Туристик поезд. Туристик поход.*

**ТУРҠА** [1] *и. иҫк.* Ебәк туҡыма. // *Турҡа кейем.* ● *Туйға барһаң, туйып бар, турҡа туның кейеп бар.* Мәҡәл.

**ТУРҠА** [2] *и. ҡар.* **торҡа.**

**ТУРЛАМА** *и. диал.* Ат күгәүене.

**ТУРНЁ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Донъя әйләнеп йөрөй торған сәйәхәт. *Турне яһау.* / Артист һәм спортсмендарҙың гастроль менән төрлө ҡалала йөрөшө. *Гастроль турнеһы.*

**ТУРНЕ́ПС** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Әүернә сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған, мал аҙығы өсөн сәселгән итләс йыуан тамырлы үҫемлек; мал шалҡаны.

**ТУРНИ́К** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Ике бағана менән арҡыры тимерҙән торған гимнастик снаряд. *Турникта уйнау.*

**ТУРНИ́Р** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Урта быуаттарҙа: рыцарҙарҙың хәрби ярышы. / Бөтә ҡатнашыусылар үҙ-ара берәр тапҡыр осраша торған спорт ярышы. *Хоккей турниры. Шахмат турниры. Турнирҙа ҡатнашыу.*

**ТУРПЫШ** *с. диал.* Ҡарпыш. *Турпыш ҡолаҡ.*

**ТУРПЫША** *и.* **1.** Иген тирәһендә ҡуллана торған ҙур дүрткел киндер. *Турпыша тегеү.* ■ *Ваһап оҙон бил арбаһының төбөнә турпыша йәйҙе лә көлтә тейәп ҡайтып китте.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *диал. ҡар.* **торба** [2].

**ТУРТА** *и.* **1.** Ҡайнап сыҡҡан һурпа өҫтөндәге ҡара күбек. *Һарыҡ тотош бешерелгән, ҡаҙан тулған һөҙлөк, туртаға.* З. Биишева.

**2.** *диал.* Төпрә.

**ТУРТАЙЫУ** *ҡ. диал.* Турһайыу.

**ТУРҺАЙТЫУ** *ҡ.* Асыу, үпкә белдереп ҡабартыу (иренде). *Иренде турһайтыу.*

**ТУРҺАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Асыу, үпкә белдереп, ҡабарыу (иренгә ҡарата). *Ирендәре турһайған, күҙҙәре бойоҡҡан.*

**2.** Асыу, үпкә белдереп, иренде ҡабартыу. *Турһайып йөрөү.* ■ *Рифҡәт турһайып, аҫҡа ҡарап ултыра.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТУРҺАЙЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **турһайыу** 2. *Турһайышып йөрөү.*

**ТУРҺЫҠ** *и.* Һабанан бәләкәй тар ауыҙлы тире һауыт. *Ҡаньяғаға турһыҡ аҫыу. Турһыҡҡа ҡымыҙ ҡойоу.* ■ *Беҙҙең ҡаҙаҡтар йән тиргә батып эшләй, турһыҡтарынан һыу, айран эсә.* Ғ. Ғүмәр.

**ТУРҺЫЛДАҠ** *с.* Асыуланып, мыжып һөйләнеүсән. *Турһылдаҡ кеше.*

**ТУРҺЫЛДАУ** *ҡ.* Асыуланып, мыжып һөйләнеү. *Турһылдап йөрөү.*

**ТУРЫ** *с.* **1.** Ҡараһыу ҡыҙыл, ял, ҡойроғо ҡара (йылҡы төҫөнә ҡарата). *Ҡара туры. Ҡоба туры. Ҡыҙыл туры. Туры ат.* ■ *Ғәйни ағай менән Хәсби апай бәләкәс туры бейәне егеп, .. ҡиң баҫыуға ҡарап йүнәлде.* Т. Йәнәби.

**2.** *и. мәғ.* Шул төҫтәге ат. *Минең көрән ат, Ырымбур ерәне, ҡаҙаҡ турыһы менән тиңләшеп ярыша башланы.* Д. Юлтый.

**ТУРЫНДА** *бәйл. ҡар.* **тураһында.**

**ТУРЫНСА** *и. диал.* Сепрәк балаҫ.

**ТУРЫСАЙ** *и.* Туры төҫтәге ат. *Турысай ҙа атым ай ашамай, таңға яҡын ятып юшамай* (Халыҡ йырынан).

**ТУРЫЯ** *и. диал. ҡар.* **туйыр** [2].

**ТУСА** *и. диал. ҡар.* **тыуса** [1].

**ТУҪНАҠ** *и. кит.* Хеҙмәтсе. *[Танайғол:] Мырҙағол туҫнағы ни ҙә, Либәшәү баярының сураһы ңи? Икеһе бер сама.* Ғ. Ибраһимов.

**ТУҪТАҒАН** *и. диал.* Туҫтаҡ.

**ТУҪТАҠ** *и.* Алдырҙан бәләкәй һауыт. *Ағас туҫтаҡ. Тимер туҫтаҡ. Бәләкәй туҫтаҡ. Оло туҫтаҡ.* ■ *Алтынбикә уға тулы бер туҫтаҡ айран ҡойоп бирҙе.* М. Тажи.

◆ **Таш туҫтаҡ** *диал.* ҡаса. **Туҫтаҡ эсеү** ҡыҙ менән егетте өйләндерергә килешеү.

**ТУТ** [1] *и.* **1.** Нәмәне сафландыра, ағарта торған һалҡын, еләҫ һауа. *Керҙе тутҡа элеү. Тут алған кер.* ■ *Тирене ейеткәс, тышҡа сығарып, тутҡа ҡуялар.*

**2.** Елле, һалҡын һауаның тәьҫиренән барлыҡҡа килгән сифат. *Ҡар туты.* ■ *Үҫемлектәрҙе быуып торған ҡышҡы тутты йыуа май ямғыры.* Я. Вәлиев.

**ТУТ** [2] *и.* **1.** Дым, дымлы һауа тәьҫиренән тимерҙә барлыҡҡа килгән ҡыҙғылт көрән матдә. *Тут ала. Тут ашай. Тут төшә.* ■ *Арғымаҡтан әйәр алынған, тутһыҙ ҡылыс ҡынға һалынған.* С. Кулибай. / Һаҙ һыуы өҫтөндә була торған ҡыҙғылт көрән ҡатлам. *Тут тәме килгән һыу.*

**2.** Биттә барлыҡҡа килә торған көңгөрт тап. *Ҡыйынһынма, иркәм, тут баҫҡанға маңлайыңды, алһыу йөҙөңдө.* Ш. Биҡҡол.

**3.** Үҫемлеккә ҡунған бәшмәк саңы. *Ашлыҡ туты. Ҡарағат туты. Тут бәшмәге.*

**4.** *күсм.* Иҫкелек, һөрһөгәнлек билдәһе. *Эй, йыйылғандар ҡалаға сәләле күп сәүҡәләр, иҫкереп, туттар баҫып бөткән ерәнгес ҡәүҙәләр.* Д. Юлтый.

◆ **Тут үләне** *ҡар.* **үлән.**

**ТУТ** [3] [*гәр.*] *и.*, **тут ағасы** Япрағы менән ебәк ҡорто туҡланып, ашай торған емештәре булған көньяҡ ағасы. *Улар ҡайҙа барырға белмәй, бөтә ишек алдын ҡалын япраҡтарының күләгәһе менән ҡаплап торған ҡарт тут ағасы төбөнә боҫто.* Б. Хәсән.

**ТУТ** [4] *окш.* Машинаның ҡысҡыртҡан тауышын белдергән һүҙ. *Тут итеү.*

**ТУТАЙ** [*рус.* тетя] *и. диал.* **1.** Апай.

**2.** Һеңле.

**ТУТАШ** *и.* Еткән йәш ҡыҙ. *Зөләйхә туташ мин уйлағандан да һылыуыраҡ, төҙөгөрәк булып сыҡты.* Т. Йәнәби. / Шундай ҡыҙға өндәшеү һүҙе. *[Бохарбаев:] Туташ, керегеҙ әле бында.* Н. Иҙелбай.

◆ **Шәфҡәт туташы** урта белемле медицина хеҙмәткәре. *Шәфҡәт туташтары яңы килгән яралыларҙы бәйләй.* Д. Юлтый.

**ТУТЛАНЫУ** *к. кар.* тутлау [2] 2.

**ТУТЛАТЫУ** [1] *к.* Һалҡын, еләҫ һауала сафландырыу. *Аҡлы ситса күлдәгемде кәртәләрҙә тутлатам* (Халыҡ йырынан).

**ТУТЛАТЫУ** [2] *к.* Тут [2] (1 мәғ.) менән ҡаплатыу. *Тимерҙе тутлатыу.*

**ТУТЛАУ** [1] *к.* **1.** Һалҡын, еләҫ һауала сафланыу. *Тутлаған кер. Тутлап кибеү.*

**2.** Елдә, асыҡ һауала һурығып кибеү. *Тутлаған икмәк. Тутлаған ит. Тутлаған ҡар.* ■ *[Биккужа:] Декабрь етте. Һаман ҡара көҙ булып, тутлап тик ята. Бер бөртөк ҡар төшһә, исмаһам.* Т. Килмөхәмәтов.

**ТУТЛЫ** [2] *с.* **1.** Тут [2] (1 мәғ.) менән ҡапланған. *Тутлы бысаҡ.*

**2.** Көңгөрт тап менән ҡапланған. *Тутлы бит.*

**3.** Бәшмәк саңы менән ҡапланған. *Тутлы ашлыҡ.*

**ТУТНАУ** *к. диал.* Текләү. *Тутнап ҡарау.*

**ТУТ-ТУТ** *окш.* Ҡабат-ҡабат тут иткән тауышты белдергән һүҙ. *Тут-тут итеү.*

**ТУТҺЫУ** *к.* Әҙ генә тутлау. *Тутһыған бит.*

**ТУТЫҒЫУ** (тутыҡ*ғ*) *к.* Дымланып, ҡыҙғылт көрән ҡатлам менән ҡапланыу; тут алыу. *Тутыҡҡан тимер.* ■ *Хасбулла олатай һандыҡтың күптән бикле тороп, тутыҡҡан йоҙағына кәрәсин тамыҙа-тамыҙа, көскә асты.* З. Биишева.

**ТУТЫЙ** *и. кар.* **тутыйғош** 1.

**ТУТЫЙҒОШ** *и.* **1.** Асыҡ, матур төҫлө, кәкре суҡышлы йылы яҡ ҡошо. *Банан төптәрендә еләҫ, ағастарҙа — тутыйғоштар, тутыйғоштар осҡан ерҙә ямай ҡарҙар, булмай ҡыштар.* Н. Нәжми.

**2.** *күсм.* Һылыу ҡыҙ (ғәҙәттә егеттәр телендә).

**ТУТЫҠ** *и.* Дымланыу арҡаһында тимерҙә барлыҡҡа килгән ҡыҙғылт көрән ҡатлам; тут [2]. *Тутыҡ төшә. // Тутыҡ тимер.*

● *Тутыҡ тимерҙе ашай.* Әйтем.

**ТУТЫҠТЫРЫУ** *к.* Тут [2] (1 мәғ.) менән ҡаплатыу. *Тимерҙе тутыҡтырыу.*

**ТУТЫЯ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Химик элемент, аҡһыл күк төҫтәге йомшаҡ металл; цинк. *Тутыя ташы. Тутыя күҙгә шифа.*

**ТУФ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Төҙөү материалы буларак ҡулланыла торған күҙәнәкле йомшаҡ вулканик, ултырма һәм башҡа төрҙәге тау тоҡомо.

**ТУФАН** [*ғәр.*] *и.* **1.** Дини хөрәфәт буйынса, әҙәмдәрҙең гөнаһы өсөн ер йөҙөн баҫа торған ташҡын һыу. *Туфан ҡалҡыу.*

**2.** *күсм.* Көслө ташҡын. *Ташты диңгеҙҙәр жыуылдап, ер йөҙөн баҫты туфан.* М. Ғафури.

**ТУ́ФЛИ** [*рус.*] *и.* Аяҡты бәкәлгә еткәнсе генә ҡаплай торған һай аяҡ кейеме. *Бейек үксәле туфли. Ирҙәр туфлийы. Ҡатын-ҡыҙ туфлийы. Туфли кейеү.*

**ТУШ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Тантана ваҡытында уйнала торған ҡыҫҡа музыкаль әҫәр. *Туш уйнау.*

**ТУШЬ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Махсус ысул менән әҙерләнгән шыйыҡ буяҡ (яҙыу, һыҙыу, һүрәт төшөрөү өсөн ҡулланыла). *Ҡара тушь. Ҡыҙыл тушь. Тушь менән яҙыу.*

**ТУ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Кипаристар ғаиләһенә ҡараған ваҡ ҡына тәңкә япраҡлы, мәңге йәшел ылыҫлы ағас йәки ҡыуаҡ.

**ТҮБӘ** [1] *и.* **1.** Баштың иң өҫкө өлөшө. *Түбә сәсе.* ■ *[Ғәмилә] иренең түбәһенә йоҙроҡ менән ҡуныпп-ҡуныпп ала.* Б. Бикбай. / Баш кейеменең иң өҫкө өлөшө. *Түбәһе ҡыҙыл буҫтаулы каракул кубанка кейгән Тайфуровты Сәгиҙә бер ҡарауҙа Чапаевҡа окшатты.* М. Тажи. / Шул тәңгәлдәге юғарғы тараф. *Был көндәрҙә түбәмдә тапҡа сумған ай йөрөй.* Ш. Бабич. *Ҡыҫҡырмасы, кәкүк, ай түбәмдә* (Халыҡ йырынан).

**2.** (*йәки* **тау түбәһе**) Тау башының иң өҫкө өлөшө. *Түбәһе күккә олғашҡан тау.* ■ *Ирәмәлдең ҡарлы аҡ түбәһе аяҙ көндә балҡып нур сәсә.* Ҡ. Даян.

**3.** Йорт-ҡаралтының башы. *Өй түбәһе. Һарай түбәһе. Ҡалай түбәле йорт. Түбә ябыу.* ■ *Бында өйҙәр таштан матур итеп һалынған, түбәләрен арыш һаламы менән тигеҙ, бөхтә итеп япҡандар.* Д. Юлтый. *Түбәләрҙән һарҡып тамалар яҙҙың һуңғы тамсы һыуҙары.* Ғ. Амантай. / (*йәки* **түбә таҡтаһы**) Йорт-ҡаралтының ҡыйыҡ аҫтынан йәйгән таҡтаһы. *Түбә таҡталары араһынан иҙәнгә шыптырлап тупраҡ койолдо.* «Ағиҙел», 1965, № 4. **Түбә тупрағы** түбә таҡтаһы өҫтөнә йәйгән тупраҡ.

♦ **Күҙ түбәгә сығыу** *кар.* **күҙ. Түбәгә сығыу** (*йәки* **менеү**) өҫтөнлөк алыу, өҫкә сығыу. **Түбәгә төкөрөп ятыу** *кар.* **төкөрөү. Түбә күккә тейеү** *кар.* **күк** [2]. **Түбә ҡапҡасы** *кар.* **ҡапҡас. Түбәһе тишек** башҡортса аңлаған башҡа милләт кешеһе хаҡында ситләтеп әйтелә.

● *Ил аулаҡ ҡалһа, дуңғыҙ түбәгә сыға.* Мәҡәл.

**ТҮБӘ** [2] *и.* **1.** Ырыуҙың бәләкәйерәк бер төркөмө. *Ырыу түбәгә бүленгән.*

**2.** Шул төркөм биләгән ер; аймаҡ.

**ТҮБӘ** [3] *и. диал. кар.* **тупый** [1] 1.

**ТҮБӘЛЕК** [1] *и. диал.* Әүеҫлек. *[Ирйегеттең] аттарын тишек-тошоҡ башлы түбәлек аҫтына индереп бәйләнеләр.* Н. Мусин.

**ТҮБӘЛЕК** [2] *и. диал.* Ҡалҡыулыҡ.

**ТҮБӘЛӘМ** *с. диал.* Мөлдөрәмә. *Түбәләм итеп койоу.*

**ТҮБӘЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **түбәләү** [1].

**ТҮБӘЛӘС** *и. кар.* **түмәләс.**

**ТҮБӘЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **түбәләү** [1].

**ТҮБӘЛӘҮ** [1] *к.* **1.** Баш, түбәгә һуғып туҡмау. *Түбәләп ташлау.*

**2.** *күсм.* Һөжүм итеү, туҡмау. *Дошманды түбәләү.*

**ТҮБӘЛӘҮ** [2] *к.* Түбә [1] (I мәғ.) *буйлау. Түгәй-түгәй колхоз ерҙәренән түргай оса, тиҙәр, түбәләп* (Халыҡ йырынан).

**ТҮБӘЛӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **түбәләү** [1].

**ТҮБӘН** [1] *с.* **1.** Ниндәйҙер бер кимәлдән аҫтағы. *Түбән урын. Түбән ер. // Тау түбәне. Түбәнгә ҡарау. Түбәндә тороу. // Башты түбән баҫыу. Түбән төшөү.* ■ *Сапсан ҡош түбәнгә .. атылып, Заятүләктең яурынына ҡуна.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** Һыуҙың, елдең һ. б. йүнәлгән яғындағы. *Түбән яҡ. Түбән остағы урам. // Йылға түбәне.* ■ *Кәмәнең матурын ғына һайлап алып, .. Ағиҙелдең түбән ағышына әкрен йөҙөп киттек.* Т. Йәнәби. *Дөрләп ут күтәрелде. Ул ут гелдәрен һуҙып, ел түбәненә осто.* Д. Юлтый.

**3.** Һаны, күсө, интенсивлығы һ. б. йәһәтенән күп түгел, әҙ. *Белемдең түбән кимәле. Быуҙың түбән баҫымы. Түбән вольтлы аппаратура. Түбән күрһәткестәр. Түбән темп. Түбән урожай. Түбән температура.* ■ *Хәҙер калала малдың, иттең, бигерәк тә беҙҙеке кеүек токомһоҙ малдың хакы бик түбән.* Һ. Дәүләтшина. / Башҡалар араһында әһәмиәте, тотҡан урыны буйынса ҙур булмаған. *Түбән дәрәжә. Түбән ҡатлам. Вазифаһы түбән кеше.* ■ *Беҙ түбән чин кешеләре. Уларҙан [офицерҙарҙан] уҙып, беҙ нимә эшләй алабыҙ? — Дөрөҫ инде, эш беҙҙең ҡулда түгел.* Д. Юлтый.

**4.** Сифаты ҡәнәғәтләнерлек түгел; насар. *Ҡағыҙҙың түбән сорты. Түбән сортлы ситса. Төҙөлөштөң сифаты түбән. Бойҙайҙың сығышы түбәнерәк булыуын күрһәтте һынау.* Б. Бикбай. / Етерлек дәрәжәлә үҫешмәгән. *Түбән культура.*

**5.** Үҫеш кимәленең тәүге, ябай баҫҡысындағы. *Түбән организмдар. Түбән үҫемлектәр. Түбән фаза.* // *Бәлки Гәрәйгә эште ул тиклем үк түбәндән башлап ебәрергә лә тура килмәҫ эле, ни теләһәң дә, .. атаһының аҙ-маҙ малы бар бит.* Б. Бикбай.

**6.** Башланғыс, тәүге баҫҡыстағы (белем системаһында). *Түбән белем. Түбән класс уҡыусыһы.*

**7.** Бәләкәй юғарлыҡтағы, әкрен ишетелгән (тауышҡа ҡарата). *Старшина бик түбән, ҡайғылы тауыш менән генә: «Зинһар тип үтенәм. Сурагол ағай, ебәр..»,— тип иларға кереште.* Т. Хәйбуллин.

**8.** Рухи, әхлаҡи яҡтан насар, бысраҡ. *Түбән кеше.* ■ *Бындағы халыҡ ниңәлер ваҡ, түбән булып тойолдо.* Д. Юлтый.

♦ **Йөҙ түбән** *ҡар.* **йөҙ** [1] 1.

● *Ҡыҙ алһаң, юғарынан ал; ҡыҙ бирһәң, түбәнгә бир.* Әйтем.

**ТҮБӘН** [2] *бәйл.* Сығанаҡ килештәге исемдәрҙән һуң килеп, билдәле бер кимәл, дәрәжәнән кәмлекте белдерә. *Урта кимәлдән түбән. Температура 40 градустан түбән.*

♦ **Бынан түбән** *диал.* бынан һуң.

**ТҮБӘНАУЫҘ** *и. диал.* Борош.

**ТҮБӘНГЕ** *с.* **1.** Ниндәйҙер кимәлдән аҫтағы; аҫҡы. *Бейек йорттоң түбәнге ҡатында ла өс бүлмә.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Һыуҙың, елдең һ. б. йүнәлгән яғындағы. *Һыуҙың түбәнге ағымы. Ауылдың түбәнге осо.*

**3.** Урын, дәрәжәһе иң бәләкәй. *Түбәнге инстанция.*

**4.** Халыҡ, масса менән туранан-тура бәйләнештә булған. *Түбәнге ойошмалар.*

**ТҮБӘНДӘГЕ** *с.* **1.** Ҡалҡыу урындың, һыу ағымының һ. б. түбән яғындағы. *Түбәндәге ауыл.*

**2.** Артабан буласаҡ, әйтеләсәк. *Түбәндәге миҫал. Түбәндәге мәғлүмәт.* ■ *Был ҡараштa тороусылар түбәндәге имеш хәбәргә ҡушыла төштө: ул Мәҡсүт ауылынан сыҡҡас, алдынартын ҡарамай, туҡтауһыҙ саба ла саба.* Б. Бикбай.

**ТҮБӘНЛЕК** *и.* Әхлаҡ, намыҫҡа һыймаған эш, ҡылыҡ. *Түбәнлеккә төшөү. Түбәнлек һанау.* ■ *Буржуа үҙенең йәнен һаҡлау өсөн ни ҡәҙәр түбәнлектәргә, ҡәбәхәтлектәргә бирелә.* З. Шәрҡи.

**ТҮБӘНЛЕС** *и. диал.* Уйһыулыҡ. *Түбәнлескә төшөү.*

**ТҮБӘНЛӘТЕҮ** *ҡ.* **1.** Ер өстөнә яҡын хәлгә килеү, түбәнгәрәк төшөрөү. *Самолёт осоп барыу юлын түбәнләтте.*

**2.** Һыу ағымы ыңғайына йүнәлтеү. *Йылғаның ағымы кәмәне түбәнләтеп алып китте.*

**ТҮБӘНЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Ер өҫтөнә яҡын хәлгә килеү, түбәнгәрәк төшөү. *Ҡояш түбәнләне. Юлдарға урман күләгәләре төштө.* Д. Юлтый.

**2.** Һыу ағышы ыңғайына йүнәлеү, һыу менән түбәнгә ағыу. *Йылға буйлап түбәнләү.* ■ *Сәлмән сәсәй-сәсәй, бата-сума һаман түбәнләй. Ағым уны был яҡ ярға яҡынайта.* Ә. Вахитов.

**ТҮБӘНСЕЛЕК** *и.* **1.** Кешене олоға һанаған, кеселекле, ихтирамлы мөғәмәлә; кеселеклек. *Түбәнселек күрһәтеү. Түбәнселек һаҡлау.* ■ *Шәхми .. бик түбәнселек менән: «Турә, инде нисек булһа ла эште рәтлә»,— тине.* Т. Йәнәби.

**2.** *диал. ҡар.* **түбәнлек.**

**ТҮБӘНСЕЛЕКЛЕ** *с.* Әҙәп, тәртип һаҡлаған; әҙәпле, илтифатлы. *Түбәнселекле кеше.* ■ *Талха Ғатауллин .. түбәнселекле, һөйкөмлө бер олоғына ағай ул.* С. Әлибаев. / Кеселеклек, ихтирам менән һуғарылған мөғәмәләле. *Өйрәнсек һөнәрсе янына үҙе .. ингән. Түбәнселекле, мөләйем тауыш менән сәләм биргән.* З. Биишева.

**ТҮБӘНҺЕНЕҮ** *ҡ.* Үҙең өсөн ниҙелер түбән һанау. *Ғәрләнеүҙән, түбәнһенеүҙән шартлар хәлгә еткән Батталов, яманатын таратыуҙан шөрләп, тауыш күтәреп торманы.* Я. Вәлиев.

**ТҮБӘНҺЕТЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **түбәнһетеү.** *Түбәнһетелеп йәшәү.*

**ТҮБӘНҺЕТЕҮ** *ҡ.* Түбән ҡуйып, ҡыйырһытыу; кәмһетеү. *Кешене түбәнһетеү.* ■ *Көндәше Мәргиәне түбәнһетеп, байҙың иғтибарын үҙенә йүнәлдер[геһе] килә. Шуның өсөн дә ул аш-һыуын тәмле .. итеп ярашытырырға тырыша.* Т. Хәйбуллин.

**ТҮБӘНҺЫУ** *с.* Түбәнерәк булып ятҡан (ергә ҡарата). *Түбәнһыу урын.*

**ТҮБӘНӘЙЕҮ** *ҡ.* **1.** Түбәнгәрәк, аҫҡараҡ төшөү. *Ҡояш түбәнәйҙе, көн кисекте.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Кимәле, дәрәжәһе, күләме, интенсивлығы һ. б. йәһәтенән кәмеү. *Хаҡ түбәнәйгән.* ■ *Ҡышҡыһын һыу кәмей, ер аҫты һыуҙарының кимәле түбәнәйә.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 2 апрель.

**3.** Насарға әйләнеү, насарайыу. *Продукцияның сифаты түбәнәйеү.*

**4.** Шымыраҡ, тоноғораҡ ишетелә башлау (тауышҡа ҡарата). *Тауыш түбәнәйҙе.*

**ТҮБӘНӘЙТЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **түбәнәйтеү.**

**ТҮБӘНӘЙТЕҮ** *ҡ.* **1.** Түбәнгәрәк, аҫҡараҡ төшөрөү. *Яурынды түбәнәйтеү.*

**2.** Ниҙәндер кимәлен, дәрәжәһен, күләмен, интенсивлығын һ. б. кәметеү. *Баҫымды түбәнәйтеү. Хаҡты түбәнәйтеү. Һыуҙың температураһын түбәнәйтеү.*

**3.** Насарға әйләндереү, насарайтыу. *Продукцияның сифатын түбәнәйтеү.*

4. *һөйл.* Урын, дәрәжәне кәметеү; түбәнгә әйләндереү, түбән итеү. *Кешенең вазифаһын түбәнәйтеү.*

5. Тауыштың һ. б. тонын түбәнерәк, ишетелешен шымыраҡ итеү.— *Васыятым шул һиңә,— тине карт, тауышын түбәнәйтә төшөп,— донъяны ҡулыңда нык тот.* Б. Бикбай.

**ТҮБӘСӘЙ** *и.* Самауыр мөрйәһен баҫа торған ҡапҡас; самауыр баҫҡыс.

**ТҮБӘТӘЙ**[1] *и.* Түбәгә генә кейә торған түңәрәк баш кейеме; таҡыя. *Бәрхәт түбәтәй. Сигеүле түбәтәй. Һырма түбәтәй.* ■ *Шәһит карт .. башына ҡара хәтфә түбәтәйҙе кырын ғына һалып, урамға үлән өҫтөнә сығып ултырҙы.* З. Биишева.

**ТҮБӘТӘЙ**[2] *и. диал.* Күҙләнсек.

**ТҮГЕЛ** *мөн.* **1.** Алдынан килгән һүҙҙе, фекерҙе инҡар итеү, кире ҡағыу һәм кире ҡуйыуҙы белдерә. *Урман дөм ҡараңғы. Ҡайҙа ғына ҡарама, бер ни күренерлек түгел.* Я. Хамматов. *Ниндәй таҙа кешеләрҙе лә мөмкин түгел ауырыу булмаҫка.* Ғ. Хәйри. *Иҙән аҫтынан әҙәм тиһәң әҙәм түгел, ҡотһоҙ бер ғифрит килеп сыға* (Әкиәттән).

**2.** Һорау киҫәксәһе менән килеп, фараз рәүешендәге һорауҙы белдерә.— *Беҙҙең әш ауылдаштарҙы һөйөндөрөргә тейеш. Ә беҙ көйөндөрәбеҙ түгелме?* З. Биишева.— *Айбулат улым, анауы килгән ҡараҫҡы бер һыбайлы түгелме?* Һ. Дәүләтшина. *Һай, әйелмәй бөгөлмәй, матур баҫа түгелме?* (Халыҡ йырынан).

**ТҮГЕЛЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* түгеү 1—3. *Шәкәр сөгөлдөрө еренә гектарына унар тоннанан тиреҫ түгелергә тейеш.* Р. Солтангәрәев. *Сыйырсыҡ, сыйырсыҡ, ояңдан осоп сыҡ. Оҡшаһа был өйөң, түгелһен моң, көйөң!* Р. Ғарипов. *Бейе әйҙә, бейе әйҙә, тулы туҫтаҡ түгелһен* (Халыҡ йырынан).

**2.** Күп булып ағыу (ҡан, тир, йәшкә ҡарата). *Күҙ йәше түгелә. Ҡан түгелә.* ■ *[Байгужа:] Беҙҙең бында күп тир түгелде инде.* Д. Юлтый.

**3.** *кусм.* Хәл ҡылымдың *-п* формаһында эш-хәрәкәттең мул, иркенләп, күп булып башҡарылыуын белдерә. *Түгелеп илау. Түгелеп үҫеү. Түгелеп һөйләшеү.* ■ *И, иҫәр!,— Гөлсәсәк йәнә түгелеп көлдө, ҡулы менән ҡапыл Сәғитовтың сикәһен иркәләп, сәпәкәй итеп алды.* Й. Солтанов.

**ТҮГЕҮ** (түк-) *ҡ.* **1.** Һауыттан ҡойоу, ағыҙыу, һибеү, сәсеү (шыйыҡ йәки ваҡ, бөртөклө нәмәләрҙе). *Биҙрәләге һыуҙы түгеү. Тоҡтағы бәрәңгене баҙға түгеү.* ■ *Ишек төбөнә ук йыуынды һыу түгеп, аяҡ аҫтын тайғаҡлап бөткәндәр.* Б. Бикбай.— *Бынан тиҙерәк китәйек, ҡыҙым,— тине Тәнзилә әбей,— Сәғиҙәнең түгеп ебәргән көртмәләрен унан-бынан ғына һауытҡа тултырып.* М. Тажи. / Тейәп йәки берәй төрлө итеп, берәй урынға алып барып ауҙарыу. *Ауылдың һәр бер кешеһе ишек алдына, кәртә-ҡураһына өрөп тултырылған ҡарҙы, атлыһы аты менән урамға тарттырып түгә.* Ғ. Дәүләтшин. *Белеше уны [Сәлмәнде] йәлләп: — Көлдө анау кәртә артына тук тә арбаңа картуф тейә,— тип әйтте, ти* (Әкиәттән).

**2.** Йыйылған һыуҙы һ. б. һоҫоп алыу, ситкә һибеү. *Баҙҙағы һыуҙы түгеү. Ҡәмәнең һыуын түгеү.* ■ *Селтәр һоҫко менән мәкенән боҙ вағын һирпеп түгергә керештем.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** *кусм.* Мул, күп, иркен итеп ағылдырыу, тирә-яҡҡа сәсеү (йыр, нур һ. б. шундай нәмәне). *Йылы ҡояш үҙенең нур бөртөктәрен киң яландарға, ярлы ауыл өҫтөнә түгеп тора.* Ғ. Дәүләтшин. *Мең үҫемлек мең еҫ бөрктө, көмөш ауаз түкте һандуғас.* С. Кулибай.

**4.** *кусм.* Күп итеп сарыф итеү, тотоноу.— *Бушка акса түгеп, ваҡыт әрәм итеп, ул балаларҙы уҡытып йөрөүҙән ни мәғәнә сығыр икән? — тип төртөштөрөп алды [Рәшиҙә].* М. Тажи. *Ил бәхете өсөн көстәр түгә-түгә, утә шатлыҡ менән бер йылдар.* Ғ. Амантай.

**5.** *кусм.* Кешегә һөйләп биреү, кеше менән уртаҡлашыу. *[Әхәт] комбайнды туктата ла: — Әхмәткирәй ағай, һиңә корреспондент алып килдем, тук эс сереңде,— ти.* Р. Солтангәрәев. *Новиков мәсьәләне үҫтереп, ҡабартып алып китте. Ҡыҙған баш менән .. һуғыш тураһында башында ҡайнаған бөтә фекерен түгеп һалды.* Д. Юлтый.

♦ **Йөҙ һыуын түгеү** *ҡар.* **йөҙ. Йәш** (*йәки* **күҙ йәше**) **түгеү** илау. *Ата-әсәһен һағынып, күпме йәш түкте Шәрәй.* Т. Йәнәби. **Ҡан түгеү** *ҡар.* **ҡан. Ҡырып түгеү** *шул ук* **һепереп түгеү** (*ҡар.* **һепереү**). **Тир түгеү** *ҡар.* **тир**[1].

**ТҮГӘНӘК** *и. диал.* Көйөлдө.

**ТҮГӘРЕЛЕҮ** *ҡ. диал.* Түңәрәкләнеү.

**ТҮГӘРМӘ** *и. диал. ҡар.* **күтәрмә**[2].

**ТҮГӘРМӘЛӘҮ** *ҡ. диал.* Тәгәрләү.

**ТҮГӘРӘК** *с. диал.* Түңәрәк II.

**ТҮГӘРӘҮ** *ҡ. диал.* Түңәрәкләү.

**ТҮҘ** *и. диал.* **1.** Түҙлек. *Ағас түҙе.*

**2.** Төйтә. *Һәнәк түҙе.*

**ТҮҘГӘК** *и. диал.* Түҙлек.

**ТҮҘҘЕРЕҮ** *ҡ.* Түҙергә мөмкинлек биреү. *Егет бик шәп үҫә, атаһы менән көрәшә башлай, атаһын түҙҙермәй* (Әкиәттән).

**ТҮҘЕМ** *и.* Түҙеү, сыҙау һәләте; сабыр, сыҙам. *Түҙем бөттө. // Түҙем кеше. Түҙем булыу.* ■ *Күрмәгәнгә, дуҫтар, күрһәтмәһен, түҙем бирһен ҡайғы күргәнгә* (Халыҡ йырынан).

**ТҮҘЕМЛЕ** *с.* **1.** Түҙеүгә һәләтле; сабырлы. *Түҙемле кеше.* ■ *Төкөр донъяһына, бул түҙемле, ағыулама юҡҡа тамырыңды.* Ш. Бабич.

**2.** Тышҡы тәьҫиргә бирешмәй торған, үҙенсәлеген оҙаҡ һаҡлай алған; сыҙамлы. *Һыуға түҙемле матдә.*

**ТҮҘЕМЛЕК** *и.* Түҙеү һәләтлеге; сабырлыҡ, сыҙамлыҡ, түҙем. *Түҙемлекте бөтөрөү. Түҙемлекте юғалтыу.* ■ *Түҙемлек тә әҙме әллә хәҙер ата-әсә тигән заттарҙа?* Н. Нәжми.

**ТҮҘЕМҺЕҘ** *с.* Түҙеүгә һәләтһеҙ; сабырһыҙ, сыҙамһыҙ. *Түҙемһеҙ кеше. Түҙемһеҙ булыу.*

**ТҮҘЕМҺЕҘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Түҙемһеҙлек белдереү, түҙә алмаҫ булыу. *Түҙемһеҙләнеп көтөү. Түҙемһеҙләнеп ҡыҫҡырыу.* ■ *Батша асыға башлай. Ҡатҡан икмәк киҫәген көтөп ала алмай түҙемһеҙләнеп яға, ти* (Әкиәттән).

**ТҮҘЕҮ** *ҡ.* **1.** Ниндәйҙер хәл, тәьҫир, ҡыйынлыҡ кеүек нәмәгә бирешмәй, ныҡлыҡ, сабырлыҡ һаҡлау; сыҙау. *Һыуыҡҡа түҙеү. Ауырлыҡҡа түҙеү. Түҙеүҙән уҙыу.* ■ *Сәғиҙә башының сатнап ауырыуына түҙә алмай, урынынан тороп,*

*ишекле-төрле йөрөштөрҙө.* М. Тажи. *Эшсене күп иҙҙеләр, улар һаман түҙҙеләр.* Ш. Бабич. / Тыныслыҡ, сабырлыҡ һаҡлап, күпмелер ваҡыт көтөү. *Бер сәғәткә түҙеү. Күпкә түҙеү.* ■ *Нисек тә булһа, кискә тиклем түҙергә .. кәрәк.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Тышҡы тәьҫиргә бирешмәй, тәүге хәл, рәүеште һаҡлау. *Батыр булһа, тос булыр, .. ул баҫҡанда таш түҙмәҫ, ул атҡанда ян түҙмәҫ.* «Алпамыша».

● *Ауыҙы онга тейгән эт тирмән яламай түҙә алмай.* Әйтем.

**ТҮҘЛЕК** *и.* Ағастың ерҙә ултырып ҡалған ҡыҫҡа төбө. *[Булат:] Түҙлеккә һөрөндөм, әллә ҡайҙа тәгәрәп киттем.* К. Кинйәбулатова.

**ТҮҘМЕР** *с. диал.* Түҙемле.

**ТҮКМӘЙ-СӘСМӘЙ** *р.* **1.** Түккеләп, ҡойолтоп тәләф итмәй; тулыһынса. *Игенде түкмәй-сәсмәй йыйып алыу.* ■ *— Һауғанда һөтөгөҙҙө һыйырҙан эсермәй, түкмәй-сәсмәй һауығыҙ!* Т. Хәйбуллин.

**2.** *күсм.* Бер нәмәһен ҡалдырмай; тотош. *Түкмәй-сәсмәй әйтеп биреү.* ■ *Фәхри бөгөн булып үткән хәлдәрҙе түкмәй-сәсмәй генә түгел, хатта бүяуын байтаҡ ҡына ҡуйырта төшөп, һөйләп бирҙе.* Б. Бикбай. *Беҙҙең окопта һөйләнгән һүҙҙәрҙең бары ла түкмәй-сәсмәй штабҡа еткерелгән.* Д. Юлтый.

**ТҮКМӘСЕҮ** *к. диал.* Тәкмәсеү.

◆ **Ҡырҡҡа түкмәсеү** күп төрлөгә үҙгәреү.

**ТҮКМӘСЛӘҮ** *к. диал.* Тәкмәсләү.

**ТҮКМӘСӘ** *и. диал.* Бүкән.

**ТҮКТЕРЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* түгеү. *Аҡса түктереү. Моң түктереү. Һөттө түктереү. Эс серен түктереү.*

**ТҮКӘЛЕҮ** *к. ҡар.* **төкәнеү.**

**ТҮЛ** *и.* **1.** Инә ҡош-ҡорттоң, бигерәк тә тауыҡтарҙың йомортҡалығында бәләкәй генә йомортҡа яралғылары; орлоҡтар. *[Берәү:] Тауыҡ та бит йомортҡа һалыр алдынан түл йыя.* Н. Нәжми. / Кешелә һәм һөтимәр хайуандарҙа үрсем бирә торған енси күҙәнәге. **Түл ҡаны** *ҡар.* **ҡан** [1] 1.

**2.** Нәҫелде дауам иткән үрсем, тоҡом. *[Бабай:] Ун йыл көтөү көтөгөҙ, шуның түле үҙегеҙгә булыр* (Әкиәттән).

**3.** *күсм.* Киләсәктә ҡулланыу өсөн тупланған нәмә; һаҡлыҡ. *Ауылдың бер нисә ярлыһы өсөн был аҙна байрам .. булды. Улар яңыға етерлек түл йыйып ҡалды.* И. Насыри.

◆ **Түл йәйеү** үрсеү. *[Һайыҫҡан:] Әжәлдән ҡурҡыр йән булһа, ҡотолорға юл эҙләр; түл йәйергә уйлаһа, илде гиҙеп яй эҙләр.* «Урал батыр». **Түл төйөнө** түл теләп таҡҡан бетеү.

**ТҮЛЛЕ** *с.* **1.** Йомортҡа яралғыһы, түле булған. *Түлле тауыҡ.*

**2.** Тоҡом, үрсем килтереүгә һәләтле; үрсемле, тоҡомло. *Ул [килен] сананан уң аяғын ергә һуҙыу менән, юлына аҡ келәм йәйеп, теләк теләй башланылар: «Булле, булле, булле бул, буҙәнән түлле бул».* Б. Бикбай.

**ТҮЛЛЕК** *и.* Түл ярала торған инәлек төйөнө.

**ТҮЛЛӘНЕҮ** *к.* Түлле (2 мәғ.) булыу; түллегә әйләнеү; үрсеү. *Һарайҙар кәрәк буласаҡ түлләнер мал-тыуарға.* С. Кулибай.

**ТҮЛЛӘҮ** *к.* **1.** Түлле (1 мәғ.) булыу. *Ҡуян һымаҡ бары ла йылға ике-өс түлләһә, .. шул саҡта беҙ нишләрбеҙ?* «Урал батыр».

**2.** Түлле (2 мәғ.) булыу; үрсеү. *Яҡшы хужаға юлығып, йылҡы ла түлләп киткән, ти.* «Урал батыр».

**ТҮЛҺЕҘ** *с.* Тоҡом, үрсем килтереүгә һәләтһеҙ. *Шулай уҡ түлһеҙ ҙә булманы Мәғфиә килен, йыл һайын бер ир йәки ҡыҙ бала тыпылдатып тапты ла торҙо.* Б. Бикбай.

**ТҮЛӘК** [1]: **ауыр түләк** ауыр холоҡло, тыныс тәбиғәтле. *Бабсаҡтың һөйкөмлөгө, ауыр түләк аҡыллылығы өсөн ил халҡы ла яратып, .. бей итеп һайлап ҡуялар.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ТҮЛӘК** [2] *и. иҫк. ҡар.* **түләү** [2] 2.

**ТҮЛӘМ** *и. иҫк. ҡар.* **түләү** [2] 2.

**ТҮЛӘМӘ** *и.* Малда, кешелә була торған бик йоғошло яман шешек.

**ТҮЛӘНЕҮ** *к. төш. ҡар.* **түләү** [1]. *Түләнгән аҡса.*

**ТҮЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **түләү** [1]. *Аҡса түләтеү.* ■ *БАССР граждандары дәүләт һәм йәмәғәт ойошмаларының, шулай уҡ вазифалы кешеләрҙең үҙ хеҙмәт вазифаларын башҡарғанда законһыҙ эш итеүҙәре арҡаһында килтергән зыянды түләтергә хаҡлы.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. *Ер һатылғас, бурысты түләтәләр, тамам шулай бөлдөрәләр, йөҙәтәләр* (Бәйеттән).

**ТҮЛӘҮ** [1] *к.* **1.** Хеҙмәт йәки нәмә хаҡын ҡаплау өсөн аҡса һ. б. нәмә биреү. *Аҡса түләү. Эш хаҡы түләү. Юл хаҡын түләү.* ■ *Ул [Сәғиҙә] саңғыһының иң бәләкәй генәһен һайлап алды ла, аҡсаһын түләп, магазиндан сыҡты.* М. Тажи.

**2.** Бер төрлө йөкләмәне үтәү өсөн аҡса һ. б. нәмә биреү. *Бурыс түләү. Һалым түләү. Яһаҡ түләү.* ■ *— Мәүлет байҙың малы һеҙҙең ерҙәрҙә буш утлаған. Хәҙер ул малы йөрөгән өсөн ауылға утлау хаҡын да түләргә тейеш.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТҮЛӘҮ** [2] *и.* **1.** Хеҙмәт йәки берәй нәмә өсөн бирелә торған хаҡ. *Йәшелсәнең һәр төрө буйынса пландан тыш алған урожай өсөн аҡсалата һәм натуралата өҫтәмә түләү бирелә.* Ш. Бикҡолов.

**2.** Дәүләт файҙаһына бирелә торған мәжбүри йыйым, һалым. *Түләү түләтеү.*

**3.** Яҙа рәүешендә билдәләнгән мәжбүри хаҡ; штраф. *[Староста:] Кем дә кем был әмерҙе үтәмәй, уға түләү һалына.* Ж. Кейекбаев.

**ТҮЛӘҮЛЕ** *с.* **1.** Хаҡ түләүгә ҡороулы. *Түләүле дауа. Түләүле концерт. Түләүле юл.*

**2.** Аҡсаға, хеҙмәт хаҡына эшләй торған. *Түләүле хеҙмәткәр.* / Аҡсалата хаҡ алыуға бәйле. *Түләүле отпуск.*

**ТҮЛӘҮҺЕҘ** *с.* Хаҡ түләүгә ҡоролмаған. *Түләүһеҙ билет. Түләүһеҙ дауа. Түләүһеҙ концерт.*

**ТҮЛӘШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **түләү** [1] 2. *Бурысын түләшеү.*

**ТҮМҺӘ** *и.* Сурайып ҡалҡып торған бәләкәй генә урын; түңгәк. *Хәсән аҡһаҡал, бер түмһәгә ултырып, аяғын йүнәтеп кейҙе.* Ә. Вахитов. *Тиҙ генә күкрәк менән ҡаты түмһәгә ятып, ҡаты ергә баҫтым. Түш менән шыуышып ҡороға сыҡтым.* Д. Юлтый.

**ТҮМҺӘЙЕҮ** *к.* Түмһә рәүешендә булыу. *Түмһәйеп тороу.* ■ *Ырғыҙға китә торған һыу юлының ике ягындағы түмһәйеп ятҡан бейек ҡүндек өҫтөндәге ала сәүкәләр генә ҡарҡылдаш[а].* Һ. Дәүләтшина.

**ТҮМҺӘКӘЙ** *и. анат.* Ике янбаш һөйәгенең килеп тоташҡан алғы ҡалҡыу өлөшө. *Түмһәкәй һөйәктәре.*

**ТҮМҺӘЛӘК** *и.* **1.** Бәләкәй генә ҡалҡыулыҡ. *Бер нисә минуттан ҡәбер өҫтөндә бәләкәй генә түмһәләк үҫеп сыҡты.* Х. Мохтар.

**2.** *кар.* **түңгәк 1.**

**ТҮМӘЛӘС** *и.* Ҡалҡыуыраҡ ер, һөҙәк кенә тау. *Юл бер аҙ ялан менән барҙы. Сөнәгәт түмәләскә үрләгәндә, тауҙар арьяғында ҡояш ҡалҡты.* Ж. Кейекбаев. *Һунарҙа йөрөгәндә Ғәлиәкбәров тигеҙ ялан уртаһында сәйер генә бер оҙонса түмәләскә тап булды... Йөҙ метр самаһына һуҙылған ҡалҡыу урынды арҡыры—буй йөрөп сыҡты.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТҮМӘР** *и.* **1.** Йыуан ағастың ҡыҫҡа ҡырҡындыһы. *Шафиҡ утҡа йыуан-йыуан ҡайын түмәрҙәрен тәгәрләтеп һалды.* Я. Хамматов. *Биктимер ҡайтҡас та, өйөнә инмәй, ишек алдында .. ятҡан түмәргә ултыр[ҙы].* Б. Ишемғол.

**2.** *эрл.* Аңра, туң кешегә ҡарата әйтелә. — *Һеҙҙең арала,— ти Ғүмәр,— Сания кеүек ахмаҡтар булмағандыр шул, әсәй.— Ғүмәр кеүек түмәрҙәр ҙә булмаған, ти.* С. Агиш.

**3.** *диал. кар.* **түңгәк 1.**

**ТҮМӘРТӘ** *и. диал. кар.* **түмәр 1.**

**ТҮНТӘЙЕҮ** *к. диал.* Иңкәйеү, ауышыу. *Түнтәйеп тороу.*

**ТҮНТӘРЕЛЕҮ** *к. диал.* Ауыу.

**ТҮНТӘРЕҮ** *к. диал.* Ауыштырыу.

**ТҮНӘҘЕҮ** *к. иҫк.* Хәл алыу, тын алыу. *Эштән түнәҙеп ҡалыу.*

**ТҮҢ** *и. диал.* **1.** Түмәләс. *Түңгә менеү.* ■ *Көнө бөткән әҙәм үлеп китә тигеҙ генә ерҙә түң итеп* (Халыҡ йырынан).

**2.** *кар.* **түңгәк 1.**

**ТҮҢГӘК** *и.* **1.** Һаҙлыҡта, түбән урында сурайып торған өҫтө үләнле бәләкәй генә урын, ер. *Беҙҙең алда .. өҫтөн сәсле түңгәк ҡаплаған һаҙлыҡ.* Ә. Вахитов.

**2.** *диал.* Түҙлек.

♦ **Күҙле түңгәк** *шул уҡ* **күҙле бүкән** (*кар.* **бүкән**).

**ТҮҢГӘКЛЕ** *с.* Түңгәктәр (1 мәғ.) ҡаплаған. *Түңгәкле һаҙлыҡ.*

**ТҮҢГӘКЛЕК** *и.* Түңгәк ҡаплаған урын.

**ТҮҢГӘҮЕР** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**ТҮҢКӘРЕЛЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **түңкәреү.** *Табында ла сынаяҡ түңкәрелеп, йыйындылар өйгә инергә.* Ғ. Амантай.

**2.** Өҫтө аҫҡа әйләнеү; ауыу. *Ҡотлобайҙың пар аты бер юлы үрәпсеп барып, һөрлөгөп тәгәрәне, ҡырандас түңкәрелеп китте.* Һ. Дәүләтшина.

**ТҮҢКӘРЕЛЕШ** *и.* Йәшәп килгән ижтимағи-политик системаның нигеҙҙән үҙгәреше. *Емештең күҙ алдында Иштуған үҙе лә .. донъяны аҫтын өҫкә килтергән тарихи түңкәрелештең йәнле шаһиты ғына түгел, ә ерҙә тик яҡшылыҡ һәм гүзәллек кенә хөкөм һөрһөн өсөн .. көрәшкән баһадирҙарҙың береһенә әйләнә.* З. Биишева.

**ТҮҢКӘРЕҮ** *к.* **1.** Аҫтын өҫкә әйләндереү. *Һауыт-һабаны түңкәреп ҡуйыу.* ■ *Шаһғәли сәйен тиҙ-тиҙ генә һемерҙе лә сынаяғын түңкәрҙе.* Ш. Янбаев. *Байназар .. бауҙы сисеп хитланманы, бәке менән ҡырҡып, тоҡсайҙы өҫтәлгә түңкәрҙе һәм унан тонок сылтырап алтын аҡсалар ҡойолдо.* Б. Бикбай. *Ел пассажирҙар ултырған автомобилдәрҙе ерҙән күтәрҙе, .. тимер юл вагондарын түңкәреп һалды.* Д. Бураҡаев. / *һөйл.* Бөтөргәнсә эсеү. *Бер туҫтаҡ һалҡын айранды түңкәреп ҡуйыу.*

**2.** *күсм.* Аҫтын өҫкә килтереү, нигеҙҙән үҙгәртеү. *Беҙҙең тауыш Октябрь көндәрендә иҫке ҙур донъяны түңкәреп, Ер өҫтөнә бәхетле тормошто оло байраҡ итеп күтәрҙе.* Р. Ниғмәти.

**ТҮҢКӘРТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **түңкәреү.**

**ТҮҢӘРӘК** I *и.* **1.** Бөтә нөктәләре үҙәктән бер тигеҙ алыҫлыҡта булған һыҙыҡ менән сикләнгән яҫылыҡ өлөшө. *Түңәрәктең майҙанын иҫәпләп сығарыу.* / Бейеү, йүгереү h. б. өсөн булған шундай формалағы майҙан. *Түңәрәккә сығыу.* ■ *Түңәрәк уртаһына ике ултырғыс ҡуйып, Ғәтиә апай менән ҡылған сәсле бер малай барып ултырҙы.* Т. Йәнәби. / Шундай формалағы ҡатнашсаны уратып торған кешеләр төркөмө. *Түңәрәккә теҙелеү.* ■ *Бер нисә ҡасҡы крәҫтиән килеп, беҙҙең түңәрәккә сүгәләп ултырҙы.* Д. Юлтый. *Йырлап бер-ике әйләнделәрме, юҡмы, уртала ултырғандар икеһе бергә «стоп!» тип ҡысҡырып ебәргәйне, түңәрәк шып туҡтаны.* Т. Йәнәби.

**2.** Бөтә нөктәләре үҙәктән бер тигеҙ алыҫлыҡта булған һыҙыҡ. *Түңәрәк һыҙыу.*

**3.** Әйләнә һыҙыҡ йәки түңгәләк формаһындағы нәмә. *Күҙҙе түшәмгә теклән ята торғас, әлеге аҡ түңәрәкте күрҙем... Был түшәмдең ҡап уртаһына, шул урындан лампочка төшөрөү өсөн гипстан эшләнгән биҙәк икән.* С. Агиш.

**4.** Нимәнеңдер әйләнәһе, уратаһы. *Тирмәнең түңәрәгенә кәртә тоторға кәрәк.* Т. Хәйбуллин.

**5.** Эш, шөғөл өсөн берләшкән кешеләр ойошмаһы. *Драма түңәрәге. Әҙәби түңәрәк. Түңәрәк ойоштороу.* ■ *Ауыл клубы эргәһендә стена газетаһы сығарырға ла, балалар менән рәсем төшөрөү түңәрәгендә етәкселек тә итергә .. кәрәк.* М. Тажи.

**6.** Ҡулға ҡул тотоношоп, тирәләй әйләнеп бейей торған уйын. *«Ҡыҙҙар, әйҙәгеҙ түңәрәк уйнап алайыҡ!» — Улар бер-беренең ҡулына тотоношоп, әйләнеп йөрөй башланы, гармунсы урсаға инеп баҫты.* М. Тажи.

II *с.* **1.** Дуңгәләк йәки дуңгәләк менән сикләнгән майҙан рәүешендәге. *Түңәрәк өҫтәл. Түңәрәк икмәк. Түңәрәк аҡлан. Түңәрәк күл. Түңәрәк япраҡ.* ■ *[Йәш ҡатын] алъяпҡыс кеҫәһенән түңәрәк көҙгө алып, биттәрен һыйпаштырҙы.* М. Тажи. *Шәл бәйләнем, шәл бәйләнем, шәлем түңәрәк түгел* (Халыҡ йырынан). / Киң, тулы (биткә ҡарата). *[Булат:] Әсәйем минең түңәрәк йөҙлө.* К. Кинйәбулатова.

**2.** *күсм.* Һәр яҡлап теүәл; бөтөн, етеш. *Донъялары рәтләнеп китте. Түңәрәк кенә донъя көтә башланылар.* Б. Ишемғол. *Түңәрәк тиһәң дә, китек яғы бар ине шул тормоштарының. Балалары булманы уларҙың.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1970, № 2.

**ТҮҢӘРӘКЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Түңәрәк II (1 мәғ.) итеү, түңәрәк хәлгә килтереү. *Күҙҙе түңәрәкләндереү.*

**ТҮҢӘРӘКЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Түңәрәк II (1 мәғ.) булыу, түңәрәккә әйләнеү. *Түңәрәкләнгән ай.* ■ *Тракторист урынынан ҡуҙғалманы. .. Ҡыҙ уның ҡыҫынҡыраҡ күҙҙәренең ҡапыл түңәрәкләнеп китеүен күрҙе.* Ә. Вәли.

**2.** Түңәрәк I (1 мәғ.) һаҙу. *Был яҡтың йыры һәм моңо менән таныштыу Хәсән ағайҙың уҙ өйөндә сүпләмле балаҫ өҫтөнә түңәрәкләнеп ултырған ҙур табында башланып китте.* К. Мәргән.

**3.** *күсм.* Һәр яҡлап теүәл, бөтөн, етешкә әйләнеү. *Тормош түңәрәкләнде.* ■ *Раузаның уҡырға теләге бик ташып бармай ине. Дәрте түңәрәкләнгән ҡыҙыҡай [калага] барған көндө уҡ кино-театрҙарҙың белдереүҙәрен күҙәтә башланы.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1971, № 1.

**ТҮҢӘРӘКЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **түңәрәкләү.**

**ТҮҢӘРӘКЛӘҮ** *к.* **1.** Түңәрәк II (1 мәғ.) итеү. *Соға өҫтөнән түңәрәкләп баҫҡан уҡаһы иҫкереп, ҡарайып, мишура булған.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Түңәрәк I (1 мәғ.) яһап, уратыу. *Табынды түңәрәкләп ултырған был бай бисәләр .. ашҡа тейеште.* Т. Хәйбуллин.

**ТҮҢӘРӘТЕҮ** *к.* **1.** Тирә-яҡтан әйләндереү, уратыу. *Түңәрәтеп ултырыу.* ■ *Беҙҙең дә гено күлдең буйкайында түңәрәтеп һайрай буҙ турғай* (Халыҡ йырынан).

**2.** *диал.* Тәгәрәтеү.

**ТҮҢӘРӘҮ** *к. һир.* Уратып әйләнеү; ураү. *Һайыҫҡан ситкә китте лә, түңәрәп, тағы ла ғауғалыраҡ шыҡырлай, кәйелеп оса башланы.* С. Кулибай. *Түңәрәк тә икән күлегеҙ, күл түңәрәп ята илегеҙ* (Халыҡ йырынан).

**ТҮП** *с. диал.* Йыуаш, баҫалҡы. *Түп кеше.*

**ТҮП-** *киҫ.* Тү*ғ* ижеге менән башланған төп сифат һәм рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһе бирә. *Түп-түбән. Түп-түңәрәк.*

**ТҮР** *и.* **1.** Өйҙөң ишеккә ҡаршы төп яғы. *Түргә уҙыу. // Түр яҡ.* ■ *Өйҙөң түрҙәге тәҙрәһе янында Ныязгол биттәре һарғайып бөткән бер ҡалын китапты уҡып маташа.* Һ. Дәүләтшина. *Түр булмәнең форточкаһын барып асыуым булды, йомшаҡ ҡына ҡар бөртөгө усыма килеп ҡунды.* А. Игебаев.

**2.** Урындыҡтың өҫкө яғы. *Урындыҡ түре. Түрҙә ултырыу.* ■ *Ҡуҙый түргә менмәне, сатлыҡтан ултырҙы.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». / Билдәле бер урын, ерҙең юғарғы яғы, бейек ере. *Беҙҙең гәскәр менеп ятҡан бейек тауҙың түренә* (Бәйеттән).

**3.** *күсм.* Юғары, хөрмәтле урын. *Бөтә ырыу шатланып, телдән-телгә маҡталып, илдең оло түрендә байрам табып ултырыр.* «Аҡбуҙат». **Түр башы** хөрмәтле, ҡәҙерле урын.

◆ **Түр биреү** кемгәлер һый-хөрмәт күрһәтеү. *Рәхмәт янына, умарталыҡҡа, быйыл .. ҡунаҡтар килеп йөрөнө. Рәхмәт уларға түр бирҙе.* Ж. Кейекбаев.

**ТҮРБАШ** *и. ҡар.* **турбаш.**

**ТҮРЕГЕҮ** (түрек*ғ*) *к. һөйл.* Түрҙә, ҡунаҡ арағында ултырып өйрәнеү.

● *Түрекмәгән түрен бирмәгән.* Мәҡәл.

**ТҮРКЕН** *и.* Ирҙәге ҡатын-ҡыҙҙың ата йорто. *Оло йәштәге ҡатындар .. минең түркенем тип — ҡыҙ булып үҫкән йортон, минең нағасым тип — уйнап үҫкән ауылын көрһөнә-көрһөнә иҫкә алалар.* Ғ. Ибраһимов.

● *Түркене яҡын ҡатындың тушәге йыйылмай.* Мәҡәл.

**ТҮРКЕНЛӘҮ** *к.* Түркендә ҡунаҡ булыу (тәү барғанында ҡыҙ бөтә ағай-энеһенә күстәнәс, бүләк алып бара). *Түркенләй барыу. Түркенләп ҡайтыу.*

**ТҮРКЕНСӘК** *с.* Түркенен һағыныусан, түркененә йыш йөрөүсән. *Яҡшы ҡатын шул булыр — яҡшы ҡатын йыйынсаҡ; яман ҡатын шул булыр — яман ҡатын түркенсәк* (Ҡобайырҙан).

**ТҮРӘ** *и.* **1.** *иҫк.* Рәсми урынға баш итеп ҡуйылған кеше. *Иҫәнгол ҙур түрә булһа ла, бер ҙә ябай халыҡтан ситләшмәгән, ҡаты власть ҡулланмаған.* Ҡ. Аралбаев.

**2.** *һөйл.* Ниндәйҙер эшкә баш кеше. *Түрә булыу. Түрәләр араһында йөрөү. // Түрә кеше.*

**ТҮРӘ-ҠАРА** *и. йыйн. һөйл.* Баш, етәксе кешеләр. *Бөтә түрә-ҡараны йыйыу.* ■ *Түрә-ҡара байман таптырмай.* Т. Хәйбуллин.

**ТҮРӘЛГӘЛЕ** *с. һөйл.* Тыуыр ваҡыты еткән, етлеккән (балаға ҡарата). *Түрәлгәле булып тыуыу. Түрәлгәле итеп табыу.*

**ТҮРӘЛЕК** *и.* Түрә вазифаһы. *Был түрәлек бирелдеме икән, аҡылдары камилға күрә* (Халыҡ йырынан).

**ТҮРӘ-ҺӘРЕ** *и. ҡар.* **түрә-ҡара.**

**ТҮТ** *с. диал.* Ҙур. *Түт яулыҡ.*

**ТҮ-ТҮ** *оҡш.* Машина ҡысҡыртҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ту-ту, ту-ту паровоз, яңы ерҙә барабыҙ.* Ә. Ихсан.

**ТҮТҮТ** *оҡш.* **1.** *ҡар.* **тү-тү.**

**2.** *и. мәғ. бал.* Машина.

**ТҮТӘ** [1] *с.* Ситтән урамаған, тапҡыр йүнәлештә булған; тура. *Түтә юл. // Түтәгә сығыу. // Түтә йөрөү.* ■ *Тау аша үткән боронғо арба юлы түтә булһа ла, хәҙер унан йөрөмәйҙәр.* З. Химәтуллин. *Күсәрхан түтә юлдан, Ҡуҙыйкүрпәс урау юлдан китте, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Түтә һуҡтырып булмай, шуның өсөн тауҙың битләүенән ҡыялатып үлсәйем.* К. Мәргән.

◆ **Түтәһенән әйтеү** *һөйл.* күҙгә бәреп тураһын әйтеү.

**ТҮТӘ** [2] *и. диал.* Төйҙә.

**ТҮТӘЙ** *и. диал.* Апай.

**ТҮТӘЛ** *и.* Йәшелсә ултыртыу өсөн ҡаҙып, йомшартып, бейегәйтеп ҡуйған ер. *Бер түтәл ҡыяр. Ике түтәл мәк. Түтәл яһау. Йәшелсәне түтәлгә ултыртыу.* ■ *Шаҡмаҡланып торған түтәлдәрҙә һуған, кишер .. үҫә.* С. Агиш.

**ТҮТӘЛСӘ** *и. диал.* Тәҙрә ҡашы.

**ТҮТӘЛӘТЕҮ** *к. ҡар.* **түтәләү.** *Түтәләтеп ауылға килеү.*

**ТҮТӘЛӘҮ** *к.* Нимәлер аша тураға сығыу. *Түтәләп үтеү.* ■ *Мин Сорамандан түтәләп Көҙөй төштөм.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТҮТӘНӘН-ТҮТӘ** *р.* Туп-тура, тураға. *Кешеләр бер ауылдан икенсе ауылға түтәнән-түтә һуҡтырып, ҡалтағай менән генә йөрөй башланы.* М. Тажи.

**ТҮТӘРӘМ** *и.* **1.** Нимәнеңдер дүрттән бер өлөшө. *Бер түтәрәм ҡаҙ. Бер түтәрәм сәй.* ■ *Көндөҙ тамаҡ ялғап алыу өсөн әсәйем беҙгә бер шешә һөт, .. бер түтәрәм икмәк бирҙе.* Н. Мусин.

**2.** Дисәтинәнең һигеҙҙән бер өлөшөнә тиң булған ер майҙаны. *Бер түтәрәм ер.*

**3.** Сағыштырмаса ҙур киҫәк, ҙур өлөш. *Майҙы түтәрәме менән ултыртҡыу.*

**ТҮШ** [1] *и.* **1.** Кәүҙәнең муйындан ҡорһаҡҡа тиклемге алғы өлөшө; күкрәк. *Түш һөйәге. Түшкә ҡыҫыу.* ■ *Түш менән шыуышып ҡороға сыҡтым.* Д. Юлтый. *Йәшел башлы, күк түшле өйрәктәр йөҙөп йөрөй* (Әкиәттән). / Хайуан кәүҙәһенең алғы ҡабырғаларҙы тоташтырған алға сығыбыраҡ торған өлөшө. *Аҡ түш эт. Түше киң ат.* **Түш ите** малдың түш өлөшөндәге ите.

**2.** Ҡатын-ҡыҙҙың имсәге; күкрәк. *Ҡалҡыу түш.* ■ *[Емештең] бөрләгән хәтле генә булып түш кенәһе лә ҡалҡып килгән була.* З. Биишева.

**3.** Кейемдең алғы яҡтағы өҫкө өлөшө. *Түш кеҫәһе. Түшкә сәскә ҡаҙау.*

**4.** *күсм.* Битләү. *Тау түшкәйҙәрендә һары үлән, һары үләндең төбө бөрләгән* (Халыҡ йырынан).

♦ **Баш та юҡ, түш тә юҡ** эш барышында тейешле тәртип булмағанда әйтелә. **Түш кереү** ғәйрәтләнеп ғорур ҡиәфәт алыу. *Түш кереп һөйләшеү.* ■ *Туй барғанда түш кереп көрәшкә сыҡҡан батырмы?* Салауат Юлаев. **Түш һуғыу** маҡтаныу, кәпәренеү. **Үҙе баш, үҙе түш** *ҡар.* **үҙ.**

**ТҮШ** [2] *и.* Салғы һалып сүкей торған дүрткел башлы ҙур суйын сөй; бәләкәй һандал.

**ТҮШБАУ** *и. диал.* Тамаҡбау.

**ТҮШ-БАШ** *и. йыйн.* Түш һәм баш (тышҡы ҡиәфәтте һыҙатлағанда әйтелә). *Ул [ҡыҙ] түш-баштарын ҡалҡытып, ҡыр ҡаҙы кеүек осорға ғына тора.* Д. Юлтый.

**ТҮШЕЛДЕРЕК** *и.* **1.** Йәнлек тиреһенән тегелгән, һыуыҡ үтмәһен өсөн кейем эсенән күкрәккә кейелә торған әйбер. *Түшелдерек кейеү.*

**2.** *ҡар.* **күкрәксә** 1. *Сигеүле түшелдерек.*

**3.** *диал.* Күмелдерек.

**ТҮШКЕ** *и. диал. ҡар.* **түш** [2].

**ТҮШКӘ** [*рус.* тушка] *и.* Һуйып тотошлай ҡуйған мал. *Бер түшкә ит. Һыйыр түшкәһе.* ■ *Ҡаҙ өмәләренән һуң эре мал һуйыу башланды. Келәтсоландарға һарыҡ, тана, йылҡы түшкәләре эленде.* Р. Низамов.

**ТҮШЛЕК** *и. диал.* **1.** *ҡар.* **түшелдерек** 1.

**2.** *ҡар.* **яға** [2].

**ТҮШТАПАУ** *и. диал. ҡар.* **түш** [2].

**ТҮШӘК** *и.* **1.** Ятҡанда аҫҡа түшәй торған ҡаралды. *Йомшаҡ түшәк. Ҙур түшәк. Түшәк тышы. Түшәк йәйеү.* ■ *Туй көнө килеп еткәс, еңгәләр .. сымылдыҡ, шаршау ҡороп, мамыҡ түшәктәр түшәп кейәү менән ҡыҙға урын әҙерләне.* З. Биишева. / Йоҡо урыны. *Бүтәгәле үлән, буҙ ялан, кемгә түшәк булмаған?* Салауат Юлаев.

**2.** Төҫлө тауар менән көпләп, биҙәп сиккән кейеҙ. *Ҡыҙыл түшәк.*

♦ **Түшәккә талашыу** ҡыҙҙың урын ҡаралдыһын сисә алмаҫлыҡ итеп сырмап, еңгәләргә бирмәй талаша торған туй йолаһы. **Үлем түшәге** үлем алдындағы хәл. *Үлем түшәгендә ятыу.*

**ТҮШӘК-ЯҪТЫҠ** *и. йыйн.* Урын әйберҙәре, ҡаралды.

**ТҮШӘЛЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **түшәү** 1, 2. *Түшәлгән балаҫ.* ■ *Йомшаҡ итеп ҡаҙҙың ояһына һалам тигән түшәк түшәлгән.* Ш. Бабич.

**2.** Ятып, йығылып, тотош өҫтөн ҡаплау. *Мүк еләге түшәлеп үҫә.* ■ *Аҡландарҙа, ҡыҙыл балаҫ йәйгән һымаҡ, еләктәре түшәлеп ята.* Ш. Насыров.

**ТҮШӘМ** *и.* Өйҙөң, ҡураның бура өҫтөнә таҡтанан түшәп һалынған эске түбәһе; түбә таҡтаһы. *Түшәм таҡтаһы. Түшәм тупрағы.* ■ *Ҡыйыҡ ике яҡтан да асыҡ, түшәм өҫтөндәге тупраҡты ел осорған.* Ә. Гәрәев. *Түшәмгә тиклем өйөп ҡуйылған урын .. күҙҙең яуын алып тора, ти* (Әкиәттән).

♦ **Түшәмгә төкөрөп ятыу** *шул уҡ* **түбәгә төкөрөп ятыу** (*ҡар.* **төкөрөү**).

**ТҮШӘМЕС** *и. диал.* **1.** Түшәк.

**2.** Буй юрған, түр юрғаны (*ҡар.* **юрған**).

**3.** Сепрәк балаҫ.

**ТҮШӘМӘ** *и.* Берәй нәмә өҫтөнә түшәп, теҙеп һалынған таҡта, бүрәнә, һалам һ. б. *Таҡта түшәмә. Кәртә түшәмә.*

**ТҮШӘНЕҮ** *ҡ.* Аҫтыңа түшәк түшәү, урын һалыу. *Түшәнеп ятыу.*

● *Түшәге бар түшәнер, икмәге бар көйшәнер.* Мәҡәл.

**ТҮШӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **түшәү** 1, 2. *[Сәрбиямал] түбә тупрағын яңыртҡанда, тупраҡ аҫтына япраҡ түшәтте.* З. Биишева.

**ТҮШӘҮ** *ҡ.* **1.** Нимәнелер тағатып, нимәнеңдер өҫтөнә йәйеп һалыу. *Ашъяулыҡ түшәү. Аҫҡа бесән түшәү. Иҙәнгә кейеҙ түшәү. Түшәк түшәп ятыу.* ■ *Тимербай арба аҫтына сәкмән түшәп, аяҡ бөкләп ултырған.* З. Биишева.

**2.** Берәй нәмә эшләгәндә таҡта йәки бүрәнәне теҙеп, ҡоршап һалыу. *Иҙән түшәү. Түбә таҡтаһы түшәү. Бүрәнәнән күпер түшәү.* / Таратып, тигеҙләп өҫтән йәйеү. *Бетон түшәү. Юлға ҡырсын түшәү. Асфальт түшәү.*

**3.** *күсм.* Күп итеп үлтереү, ҡырыу. *Һалдаттарҙың ҡылысы, имеш, бер һелтәп ебәрҙеме — унлаған кешене түшәй ҙә һала.* С. Агиш.

♦ **Бауыр** (*йәки* **йөрәк**) **түшәп ятыу** һуҙылып, йөҙ түбән лыпын ятыу.

**ТҮШӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **түшәү** 1, 2. *Иҙән түшәшеү. Юлға кирбес түшәшеү.*

**ТФҮ** *оҡш.* **1.** Төкөрөүҙе белдергән һүҙ. *«Тфү»,— тип, йәш ҡатын ауыҙындағы һағыҙын төкөрөп ташланы.* М. Тажи.

**2.** *ымл. мәғ.* Төкөрөү ишараты менән йән көйгәндә, асыуланғанда, мыҫҡыл иткәндә әйтелә. *[Самат:] Тфү! .. Тынғы бирмәнеләр.* С. Кулибай.

**3.** *ымл. мәғ.* Төкөрөү ишараты менән күҙ тейеүҙән, ен-шайтан шауҡымынан ҡурсалап әйтелә. *Тфү, күҙ теймәһен.*

**ТШУ** *ҡыу.* Ат ҡыуғанда әйтелә. *[Карт:] Тшу, тшу, хайуан! Хәҙер етәбеҙ.* Т. Хәйбуллин.

**ТЫБЫРСЫНЫУ** *ҡ.* **1.** Түҙемһеҙләнеп аяҡтарҙы алмаш-тилмәш баҫыу йәки ятҡан ерҙән аяҡтарҙы алмаш-тилмәш килтереп, тәртипһеҙ хәрәкәттәр яһау. *Ат ауыҙлығын сәйнәп, башын сайҡап, урынында тыбырсынды.* Я. Хамматов.

*Илгә оран һалғанда бишектәге бала ла тыбырсынып уянды.* М. Буранғолов.

**2.** Ысҡынырға, ҡотолорға йәки торорға теләп аяҡ-ҡул, бөтә тән менән тәртипһеҙ хәрәкәттәр яһау; борғаланыу, тулау. *Бөтә көс менән тыбырсынам, тороп булмай.* С. Агиш. *Һалдат миңә килеп йәбеште. Мин, унан ысҡынырға тырышып, тыбырсынып ҡараһам да көс етмәй.* Ш. Насыров.

**ТЫБЫРҺЫҠ** *с. диал.* Ҡыйшанлаҡ.

**ТЫҒЫҘ** *с.* **1.** Йөрөү, тороу өсөн урыны әҙ, майҙаны бәләкәй; иркен түгел; ҡыҫыҡ. *Тығыҙ бүлмә. Тығыҙ урын. Иртәнсәк трамвай тығыҙ була.* ■ *Тығыҙ бүлмәләге бөтә нәмә икешәрләнгән кеүек күренә башланы.* Ә. Бикчәнтәев.

**2.** Ҡыҫып, кипсәлеп торған, иркен түгел; тар. *Тығыҙ күлдәк. Тығыҙ аяҡ кейеме.*

**3.** Ара-араһы яҡын; ҡуйы, йыш. *Тығыҙ үлән.* // *Тығыҙ ултырыу. Тығыҙ урынлашыу.* ■ *Тығыҙ әрәмә эсендә тартайҙар тартылдай.* Т. Йәнәби. *Эй урҙың һин, урҙың; артыңда теҙелеп ҡалды тығыҙ усмалар.* М. Кәрим. / *күсм.* Туранан-тура, яҡын, ныҡлы (үҙ-ара мөнәсәбәт, бәйләнешкә ҡарата). *Тығыҙ элемтә. Тығыҙ мөнәсәбәт.* ■ *Ҡындан ҡылыс һурҙы егеттәр .. һәм баҫтылар тығыҙ сафтарға.* Р. Ниғмәти.

**4.** Тотоуға, ҡыҫыуға әҙ бирешкән; йомшаҡ йәки бушаҡ түгел. *Тығыҙ мендәр. Тығыҙ туп.* / Тартып ныҡ ҡыҫылған, бушаҡ түгел. *Тығыҙ көлтә. Тығыҙ бәй.* // *Тығыҙ бәйләү.* / *күсм.* Көпшәк булмаған, ныҡ (тәнгә ҡарата). *Тығыҙ тәнле бала.* ■ *Хәлим оҫта, етеҙ хәрәкәттәр менән .. Ишбулдының туптай тығыҙ кәүҙәһен йәлп иттереп ситкә ырғытты.* Ф. Рәхимғолова.

**5.** Өлгөрөү мөмкинлеге әҙ; ашығыс, ҡыҫтау. *Тығыҙ ваҡыт.* ■ *Хәҙер ауылда эштең иң тығыҙ сағы: арыш сәсергә, ер һөрөргә, мал аҙығы әҙерләп ҡалырға кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 22 август. / Тотоноу, ҡулланыу өсөн етмәгән; ҡыҫынҡы. *Аҡсаға тығыҙ саҡ. Ашау-эсеүҙең тығыҙ ваҡыты.* **Тығыҙға килеү** 1) күп булыу (эшкә ҡарата). *Бөгөн эш тығыҙға килде;* 2) ҡыҫынҡы булыу, етмәү (аҙыҡ-түлек, аҡса һ. б. ҡарата). *Ҡоролоҡ менән мал аҙығы тығыҙға килде.*

**ТЫҒЫҘАЙЫУ** *к.* Тығыҙға, ҡыҫтауға әйләнеү (эшкә ҡарата); күбәйеү. *[Мырҙабай:] Бөгөн тамаҡҡа ашаған да юҡ, ай-һай, малайҙар, эш тығыҙайҙы.* А. Мөбәрәков.

**ТЫҒЫҘЛАНДЫРЫУ** *к. һөйл.* Тығыҙға (4 мәғ.) әйләндереү, тығыҙ итеү. *Мамыҡ өҫтәп мендәрҙе тығыҙландырыу.*

**ТЫҒЫҘЛАНЫУ** *к.* **1.** Йөрөү, тороу өсөн тарға әйләнеү; иркенлеге бөтөү, ҡыҫынҡыланыу. *Бүлмә тығыҙланды. Мал ишәйҙе, кәртә эсе тығыҙланды.*

**2.** Ара-араһы бик яҡынға әйләнеү; тығыҙға әйләнеү, ҡыҫылыу, йышайыу. *Мин сабаталарҙың бер генә ҡатын теҙеп сығам, икенсе ҡатын эсәй үҙе теҙә, юғиһә, йүкәләр тығыҙлангас, шөшлө керетергә минең көс етмәй.* З. Ғәлимов.

**3.** Йомшаҡлыҡ, бушаҡлыҡ сифаты бөтөү, тығыҙға әйләнеү, тығыҙ булыу. *Епшек бурандан һуң ҡар тағы ла тығыҙлана төшкән, саңғылар еңел шыуа.* Ф. Әсәнов.

**4.** *күсм.* Ашығыс, ҡыҫтауға әйләнеү; ҡыҫтауланыу. *Эш тығыҙланды.* / Етешһеҙ, ҡыҫынҡыға әйләнеү, ҡыҫынҡы булыу, етмәү. *Ашау яғы тығыҙланды.*

**ТЫҒЫҘЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **тығыҙлау** 1, 2. *Бүлмәне тығыҙлатыу.*

**ТЫҒЫҘЛАУ** *к.* **1.** Баҫып, төйөп бушаҡлығын, йомшаҡлығын бөтөрөү; тығыҙ итеү. *Тығыҙлап һалыу. Төйөп тығыҙлау. Трактор менән тапатып силосты тығыҙлау.* ■ *Һалдаттар .. алған нәмәләрен бәйләйҙәр, сумкаларына тығыҙлап тултыралар.* Д. Юлтый. / Ныҡ тартып ҡыҫыу. *Тығыҙлап бәйләү. Ҡайышты тығыҙлап быуыу.*

**2.** Араларын бер-береһенә ныҡ яҡынайтыу; йышлау. *Тығыҙлап ултыртыу.* / *күсм.* Бәйләнеш, мөнәсәбәт йәһәтенән яҡынайтыу. *Сафты ныҡ тығыҙлап, берҙәм торған миллион һаҡсылар.* Ғ. Амантай.

**3.** *диал.* Ашыҡтырыу, ҡабаландырыу.— *Текә ярҙарҙы ипләп кенә һикертеп сығығыҙ. Бындай урында атты тығыҙламағыҙ.* Ш. Шәһәр.

**ТЫҒЫҘЛЫҠ** *и.* **1.** Тығыҙ (1—4 мәғ.) булған хәл. *Бүлмәнең тығыҙлығы. Илдәге халыҡтың тығыҙлығы. Кейемдең тығыҙлығы. Эштең тығыҙлығы.*

**2.** *физ.* Есем массаһының күләменә сағыштырмаһы менән билдәләнелә торған физик дәүмәл. *Есемдең тығыҙлығы.*

**ТЫҒЫЛДЫРЫУ** *к.* Тығылырға (2 мәғ.), ҡулды тығырға юл ҡуйыу. *Кеҫәгә тығылдырыу. Оло лар һүҙенә тығылдырыу.*

**ТЫҒЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **тығыу.** *Төнлөккә тығылған сепрәк. Ҡынға тығылған ҡылыс. Итәк һыуға тығылған.*

**2.** Ҡайҙалыр ҡулды тығыу. *Кеҫәгә тығылыу.* ■ *Фатима иҙеү эсенә тығылып, гәүһәр ҡашлы ике алтын алҡа килтереп сығарҙы.* Б. Бикбай.

**3.** *күсм.* Кәрәкмәгән урында, урынһыҙға берәй эшкә, һүҙгә ҡатнашыу; ҡыҫылыу. *Кеше эшенә тығылыу.* ■ *Баймораt ҡапыл тығылып бармай торған, һәр эштә түҙемлек күрһәткән, сабыр егет ине.* К. Мәргән. *[Рәшиҙә:] Әбей, һин тейеш булмаған ергә тығылма, үҙ эшеңде бел, яраймы!* М. Тажи.

**4.** Тар, ҡыҫыҡ урынға күп булып йыйылыу, ҡыҫылыу, кипсәлеү. *Халыҡ ишеккә килеп тығылды. Күпергә боҙ тығылды.* ■ *Тығылған бүрәнәләрҙе бағур менән төрткөләп ағыҙғанда, ҡыуғынсы .. һыуға төшөп, ағып та китә.* Ж. Кейекбаев. *Тоҡсайҙарын аҫҡан малайҙар мәктәп ишегенә тығылған.* Ғ. Амантай. / Тамаҡҡа килеп кәпләнеп үтә алмай тороу (ғәҙәттә аҙыҡҡа ҡарата әйтелә). *Бригадир һоғонғаны тамағына тығылып, сәсәп ебәрҙе.* Б. Бикбай. / *күсм.* Тышҡа сыҡмай тотолоу (эске кисерештәргә бәйле хәлгә ҡарата). *Асыу алҡымға тығылды.* ■ *[Бикчимерҙең] күҙенә йәш эркелде. Тамағына ҡаты .. төйөн килеп тығылды.* Ф. Иҫәнғолов. / *күсм.* Өҫтө-өҫтөнә килеп күбәйеү. *Эш килеп тығылды.* ■ *Карам эшенән туҡтамай, ә башына әллә ниндәй уйҙар тығыла.* Н. Мусин.

**5.** Нимәлер кипсәлеп юл бикләнеү. *Торба тығылған. Улаҡ тығылған. Тығылып ятҡан һыу.* ■ *Ҡарттың сығышы залда ултырыусыларҙы.., тығылып ятҡан күләүекте йырып ебәргән һымаҡ,*

*дәррәү күҙғатып ҡуйҙы.* М. Тажи. / *күсм.* Берәй хис-тойғо тәьҫирендә тын тотолоуға ҡарата әйтелә; быуылыу. *Ҡыҙ күҙ йәштәренә тығыла-тығыла әсәһенә һырышты.* В. Исхаҡов.

◆ **Өнө тығылыу** 1) һүҙ әйтә алмаҫлыҡ булыу; 2) бөтөү, ғүмере өҙөлөү. *Ил баҫыусы вәхшиҙәрҙең өнө тығылды инде.* Ф. Дәүләтшин. **Өнөң тығылғыры!** ҡарғағанда әйтелә.

**ТЫҒЫЛЫШЫУ** *к. урт. кар.* тығылыу 4. *Тығылышып килеп инеү. Ишеккә тығылышып үтә алмай тороу.*

**ТЫҒЫН** [1] *и.* **1.** Тар ауыҙлы һауытты яба торған нәмә. *Ағас тығын. Быяла тығын. Шешә тығыны.* / *һөйл.* Төтөн юлын япҡан нәмә. *Мөрйә тығыны. Сыуал тығыны. Тығынды асыу.*

**2.** Һыу менән ағып килгән нәмәләрҙән барлыҡҡа килгән тотҡарлыҡ. *Тығынды йырыу. Тығынды таҙартыу.* ■ *Үкереп ҡайнай ташҡын, боҙ тығыны ҡыҫа күперҙе.* М. Тажи.

**ТЫҒЫН** [2] *с.* **1.** Буш урыны әҙ; иркен түгел; тар, тығыҙ. *Тығын бүлмә. Тығын булыу.* ■ *Автобус тығын; бәндәләр тотоноп, баҫып бара.* Т. Арслан.

**2.** Өлгөрөү мөмкинлеге әҙ; ашығыс, ҡыҫтау. *Тығын саҡ. Эштең тығын ваҡыты.*

**ТЫҒЫНДЫРЫУ** *к. һөйл.* Алдынан ҡалғанса ашатыу.

**ТЫҒЫНЛАУ** *к.* Тығын менән ябыу, тығын тығыу. *Шешәне тығынлау.*

**ТЫҒЫНСЫҠ** *и. диал. кар.* тығын [1]. **Тығынсыҡ кеүек** бик ныҡ бысраҡ, ҡарайған әйбергә әйтелә.

**ТЫҒЫНЫУ** *к. һөйл.* Бер юлы күп итеп ашау. *Туймаҫтай булып тығыныу.*

**ТЫҒЫНЫШЫУ** *к. һөйл. урт. кар.* **тығыныу.**

**ТЫҒЫРЛАТЫУ** *к.* Тығыр-тығыр иттереү, тығыр-тығыр иткән тауыш сығарыу.

**ТЫҒЫРЛАУ** *к.* Тығыр-тығыр итеү, тығыр-тығыр килеү. *Арба тығырлап бара.* ■ *Тығыр ҙа тығыр таш тирмән, арышы юҡҡа тығырлай* (Сеңләүҙән).

**ТЫҒЫР-ТЫҒЫР** *окш.* Ҡытырыны нәмә ышҡыла-ышҡыла яй ғына әйләнгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Арба тығыр-тығыр алға тәгәрләй.*

**ТЫҒЫРЫҠЛАУ** *к. диал.* Тығыҙ ергә ҡыҫылып ҡамасаулау.

**ТЫҒЫРЫЛЫУ** *к. һөйл.* Өҫтө-өҫтөнә килеп тығылыу, күбәйеү. *Тығырылып килгән буталсыҡ уйҙарға бирелеп, оҙаҡ ойоп яттым.* Н. Мусин.

**ТЫҒЫРЫН** *с. диал. кар.* **тығын** [2].

**ТЫҒЫУ** (тыҡ*з*) *к.* **1.** Берәй нәмәне һауыттың тар ауыҙына тығыҙлап индереү. *Мискәнең бөкөһөн тығыу. Шешәнең тығынын тығыу.* / Ярыҡ, тишекте берәй нәмә менән тығыҙлап ҡаплау. *Тәҙрә ярығын тығыу. Төнлөктө сепрәк менән тығыу.*

**2.** Ниҙе лә булһа бер аралыҡ, ҡыуышлыҡ эсенә индереү. *Ҡулды кеҫәгә тығыу. Ҡуныҫҡа бысаҡ тығыу.* ■ *Мылтығыма патрон тыҡтым да тағы аттым.* Ә. Бикчәнтәев. *Шайтан бүрәнә ярығына ҡулын тыҡҡан* (Әкиәттән). / Ниҙе лә булһа бер аралыҡтан үткәреү. *Тәҙрәнән башты тығыу. Ишектән ҡулды тығыу.* ■ *Хужа тәҙрә төбөнә барып, баш тығып, тыштағыларға ҡысҡырҙы.* Д. Юлтый.

**3.** Ниҙәлер берәй аралыҡ, ҡыуышлыҡ эсенә һалыу, ҡуйыу. *Ҡулъяулыҡты кеҫәгә тығыу. Мейескә утын тығыу.* ■ *Булат саңғыларын карауат аҫтына тығып ҡуйҙы.* М. Тажи. *Ҡарт йөҙ һумды ҡуйынына тыға* (Әкиәттән). / Шыйыҡлыҡ эсенә батырыу. *Аяҡты һыуға тығыу. Бармаҡты буяуға тығыу.*

**4.** Ҡайҙалыр йыйыу, йәшереү. *[Ғәзимә:] Ҡалаҡ-малаҡты теүәлләмәнем, урлап тыҡҡандыр әле.* Һ. Дәүләтшина.

**5.** *күсм.* Кешенең ихтыярынан тыш ҡайҙалыр олаҡтырыу, ебәреү. *Кешене төрмәгә тығыу.* ■ *Күңел әрней, әрней боҙло һалҡын, буранлы ел мине һуҡҡанға; ел осороп мине яҡты ерҙән ҡараңғыға илтеп тыҡҡанға.* Ш. Бабич.

**6.** *күсм.* Нимәгәлер ҡулланыу, тотоноу (ғәҙәттә урынһыҙ тип тапҡанда әйтелә). *Аҡсаны ашауға тығыу.* ■ *Старателдәр тапҡандарын араҡыға тыҡты.* Я. Хамматов.

◆ **Ауыҙын тығыу** *шул уҡ* **өнөн тығыу** (*кар.* **өн** 2) **Баш тығыу** *кар.* **баш. Ер ҡуйынына тығыу** *шул уҡ кәбергә тығыу* (*кар.* **кәбер**). **Ҡул тығыу** *кар.* **ҡул** [1]. **Морон тығыу** урынһыҙға ҡыҫылыу. *Был ниндәй һөмһөҙ бәндә булды. Ауылға килеүе яңы, ә морон тыҡмаған ере юҡ.* Ә. Мирзаһитов. **Таяҡ тығыу** *кар.* **таяҡ. Энә тыҡҡыһыҙ** үтә тығыҙ, ҡыҫтау.

**ТЫЖЛАУ** *к. кар.* **шыжлау** 1. *Тыжлап ултырған самауыр.*

**ТЫЖ-ТЫЖ, тыж да тыж** *окш.* Ҙур себен, иңкеш осҡанда сыҡҡан дауамлы тауышты белдергән һүҙ. *Тыж-тыж итеү. Тыж-тыж килеү. Тыж да тыж осоу.*

**ТЫЖЫҒЫС** *и. диал. кар.* **ҡырғыс** 3.

**ТЫЖЫҠ** *и. диал.* Тултырма.

**ТЫЖЫЛДАУ** *к.* Тыж-тыж итеү, тыж-тыж килеү. *Тыжылдап иңкеш оса.*

**ТЫЖЫМ** [1] *и.* Ауҙы киреп тотҡан аҫлы-өҫлө бау; ау арҡаны. *Аҫҡы тыжым. Өҫкө тыжым.*

**ТЫЖЫМ** [2] [*гәр.*]: **тыжым итеү** *диал.* иҫәпләшеү.

**ТЫЖЫНЫУ** *к.* Тән менән нимәгәлер ышҡыныу; тызыныу. *Хайуан барып тыжынғандыр инде.., кәртә торого менән йығылған.* Ж. Кейекбаев. / *һөйл.* Тырнаныу.

**ТЫЖЫУ** *к. һөйл.* Ныҡ итеп баҫып ышҡыу; тызыу. *Тыжып йыуыу.*

**ТЫЗАНЛАУ** *к.* **1.** Тыз-быз килеп йүгереклəү. *Тызанлап йөрөү. Тызанлығы сығыу.*

**2.** *күсм.* Кемдер ризаһыҙлыҡ белдереп тауышланғанда әйтелә. *[Яҡуп — Хәмиткә:] Тауышҡа ҡуйғас, һин дә ҡул күтәрҙеңме?.. Шулай булғас хәҙер тызанлама.* Б. Бикбай.

**ТЫЗАН-ТЫЗАН** *р.* Бик тиҙ генә, етеҙ хәрәкәттәр менән (күмәккә ҡарата әйтелә). *Балалар сеүәтәләрен күтәреп, ситән аласыҡҡа тыҙан-тызан йүгерешәләр.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТЫЗ-БЫЗ, тыз да быз** *окш.* Туҡтауһыҙ бер тегеләй, бер былай йөрөгәндә, ҡабалан етеҙ хәрәкәтте белдерә. *Тыз-быз килеп йөрөү. Тыз да быз йүгерешеү.* ■ *Мин дә, табан аҫтын майлағандай, тыз-быз йүгерергә керештем.* М. Садыкова.

**ТЫЗҠ-ТЫЗҠ** *окш.* Гармун тартҡанда, ҡалайға һыу сәсрәгәндә сыҡҡан өҙөк-өҙөк нәҙек тауышты белдергән һүҙ. *Тызҡ-тызҡ итеү.*

**ТЫЗҠЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Тызҡ-тызҡ иттереү, тызҡ-тызҡ иткән тауыш сығарыу. *Гармун тызҡылдатыу.*

**ТЫЗҠЫЛДАУ** *ҡ.* Тызҡ-тызҡ итеү, тызҡ-тызҡ килеү. *Тик гармун ғына ҡайҙалыр бейеү көйөн тызҡылдай.* Б. Бикбай.

**ТЫЗЛАП** *р.* Бик тиҙ, етеҙ хәрәкәттәр менән. *Ҡаҙиса әбей килеп ингәндәгенән дә яманыраҡ тызлап сығып китте.* В. Нафиҡов.

**ТЫЗЛАТЫП** *р. ҡар.* **тызлап.** *Тейен .. имән башына тызлатып менеп тә китте.*

**ТЫЗ-МЫЗ, тыз да мыз** *окш. ҡар.* **тыз-быз.**

**ТЫЗРАЙТЫУ** *ҡ.* Йөҙгә, күҙгә асыу билдәһе сығарыу. *Күҙен тызрайтып ҡарау. Йөҙҙө тызрайтыу.*

**ТЫЗРАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Көсөргәнеп ҡыҙарыу, бүртенеү. *Талха тызрайып, ҡып-ҡыҙыл булып, майҙанда Хөсәйен менән билләшә ине.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *күсм.* Йөҙгә, күҙгә асыу, ризаһыҙлыҡ билдәһе сығарыу. *Ҡайһы берәүҙәр .. кенә ҡыуып, гүмер буйы тызрайып, әсенеп йөрөйҙәр.* А. Игебаев.

**ТЫЗРАНЛАУ** *ҡ. ҡар.* **тызанлау.**

**ТЫЗТАНЛАУ** *ҡ. һөйл. ҡар.* **тыртанлау** 3. *Рауил сыҙаманы, тызтанлап сабып сығып китте.* К. Кинйәбулатова.

**ТЫЗ-ТЫЗ** *окш.* Ҡалай нәмәгә һыу сәсрәп бәрелгәндә сыҡҡан өҙөк-өҙөк нәҙек тауышты белдергән һүҙ. *Тыз-тыз итеү. Тыз-тыз килеү.*

**ТЫЗЫЙ** *и. диал.* **1.** Бал ҡорто.

**2.** Илаҡ.

**ТЫЗЫҠЛАУ** *ҡ.* **1.** Ҡат-ҡат, өҫтө-өҫтөнә тызыу. *Фәйзрахман ағай, ҡултыҡ таяғының осо менән ерҙе тызыҡлап байтаҡ һүҙһеҙ ултырҙы.* Н. Мусин.

**2.** *күсм. һөйл.* Бер һүҙҙе ҡат-ҡат ныҡыу. *Тызыҡлап тороу.*

**ТЫЗЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Тыз-тыз иттереү, тыз-тыз килтереү.

**ТЫЗЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Тыз-тыз итеү, тыз-тыз килеү. *Күнәккә алмаш-тилмәш тызылдап һөт саптырғаны ишетелә.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *диал.* Әкрен генә һыҙып тауыш биреү (һыйыр малына ҡарата). *Быҙау тызылдай.* / Көйһөҙләнеү, илау (балаға ҡарата).

**ТЫЗЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **тызылдау** 2.

**ТЫЗЫНМА** *и. диал.* Бер һүҙҙе тызып йөҙәткән. *Тызынма кеше.*

**ТЫЗЫНЫУ** *ҡ.* Тән менән нимәгәлер ышҡыныу; тыжыныу. *[Һыйыр] тызыныргa, ҡысығaн ерен ышҡырға теләп, таҡтаға барып терәлде.* С. Агиш. / *һөйл.* Тырнаныу.

**ТЫЗЫРЫҠЛАУ** *ҡ.* Нимәлер талап итеп тынғы бирмәү, ҡыҫмаҡҡа алыу. *Сәлмән ҡарт улгәс, Әхмәҙи мираҫ булешергә тызырыҡлап йөрөп ҡараһа ла, барып сыҡманы.* Ж. Кейекбаев.

**ТЫЗЫТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **тызыу.**

**ТЫЗЫУ** *ҡ.* **1.** Ныҡ итеп ышҡыу. *Тызып йыуыу. Тызып һөртөү.* ■ *Әсәйем [ҡырғыска] .. тызып, картуф ҡырып ултыра ине.* Н. Мусин. / *һөйл.* Тырнау. *Башты тызыу.* ■ *[Ат] һалпыш ирендәрен ҡыймылдатып .. Ҡорманғазы ағайҙың иңбашын тызый башлаған булды.* Р. Солтангәрәев.

**2.** *күсм.* Тынғы бирмәй бер һүҙҙе ныҡыу. *Тызып йәнгә тейеү. Тызып ҡына тороу.* ■ *Алдығы өсөн гәфү итмәнем: күп тызыманым тызыуын, шулай ҙа әскә һалып ҡуйҙым.* З. Ураҡсин.

**ТЫЙҒЫС** *и.* **1.** Ниҙеңдер бер яғы түбән, ауыш булғанда, ҡалҡытып нығытыр өсөн аҫтан ҡыҫтырылған нәмә. *Тыйғыс ҡуйып тигеҙләү.*

**2.** *диал.* Үбәк.

**ТЫЙҒЫСА** *и. туҡ.* **1.** Борғосаны нығытып ҡуйған тимер таяҡ; борғоса таяғы.

**2.** Кәләпле епте тотоу өсөн әүрнә башына тығылған бәләкәй генә шыма ағас.

**ТЫЙҒЫСЛАУ** *ҡ. һөйл.* **1.** Аралы, ярыҡ урынға әйбер тыҡҡыслау, тығыҙлап тығыу. *Бурәнә ярығын сүбәк менән тыйғыслау.*

**2.** Ҡыйыш яҡҡа тыйғыс ҡыҫтырыу. *Иҙәнде тыйғыслап тигеҙләү.*

**ТЫЙМАЛЫҠҺЫҘ** *с.* Тыйып алғыһыҙ, шаян, тыйнаҡһыҙ. *Тыймалыҡһыҙ бала. Тыймалыҡһыҙ булыу.*

**ТЫЙНАҠ** *с.* Үҙен әҙәпле, тәртипле тотҡан, тотанаҡлы, баҫалҡы холоҡло. *Тыйнаҡ бала. Тыйнаҡ булыу. // Үҙен тыйнаҡ тотоу.* ■ *[Фәсхетдин] тыйнаҡ кеше ине: ул .. кеше күҙенә кереп бармаҫ, һәр нәмәгә ҡыҫылмаҫ, саҡырылған ерҙә лә ситтән генә, йә ишек төбөнән генә ултырыр.* Н. Нәжми.

**ТЫЙНАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Тыйнаҡҡа әйләнеү, тыйнаҡ булыу. *Үҫә килә тыйнаҡланыу.* ■ *Ел дә иҫмәй, тыйнаҡланған.* Я. Ҡолмой.

**ТЫЙНАҠЛЫ** *с. ҡар.* **тыйнаҡ.**

**ТЫЙНАҠЛЫҠ** *и.* Үҙеңде тота белеү, тыйнаҡ була белеү сифаты. *[Вәлиев] элек Зәкирханов алдында оялыбыраҡ, тартыныбыраҡ, тыйнаҡлыҡ менән һөйләшә торғайны.* С. Агиш.

**ТЫЙНАҠҺЫҘ** *с.* Әҙәп һаҡламаған, үҙен тәртипһеҙ тотҡан, тотанаҡһыҙ. *Тыйнаҡһыҙ кеше. // Тыйнаҡһыҙ ҡыланыу.* / Тыйып алғыһыҙ, артыҡ шаян. *Бала саҡ ул — гонаһһыҙ саҡ, ҡайғыһыҙ саҡ тыйнаҡһыҙ саҡ.* Т. Арслан.

**ТЫЙНАҠҺЫҘЛАНЫУ** *ҡ.* Тыйнаҡһыҙға әйләнеү, тыйнаҡһыҙ булыу. *Балалар шашты, тыйнаҡһыҙлана башланылар.*

**ТЫЙНАҠҺЫҘЛЫҠ** *и.* Ҡылыҡтағы тотанаҡһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек.

**ТЫЙТАҠЛАУ** *ҡ. диал.* Туйтанлау. *Тыйтаҡлап атлау.*

**ТЫЙЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **тыйыу** 3. *Тыйылған китап.* ■ *Мартта һунарсылыҡ итеү тыйыла.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 1 март.

**2.** Үҙеңә ирек ҡуймай туҡталыу. *Тыйылып ҡалыу. Тыйыла алмай көлөү.* ■ *Мозаффар хәҙер уҡ барып Сәкинәнең хәлен белмәксе булғайны ла, тыйылды.* Н. Мусин. / Ниндәйҙер эш-хәрәкәттән туҡтау. *Барлыҡ халыҡ йыйылды, ти, ашап-эскән аштарынан тыйылды, ти.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**3.** Тынысланыу, баҫылыу. *Йөрәк һаман тыйылмай, һаман ҡайнай, һаман урғыла.* Ғ. Амантай.

**ТЫЙЫУ** *ҡ.* **1.** Тәртипһеҙ, тотанаҡһыҙ ҡылыҡҡа ирек ҡуймай тотоу. *Тыйып килеү. Тыйып тотоу.* ■ *Ғәзимә .. Мәғфүрәне, ҡыҙын тыймауҙа*

*гәйеплән, ирләргә кереште.* Һ. Дәүләтшина. *Малайыңды тый, малайың бик уҫал* (Әкиәттән). / Берәй эшкә, ҡылыҡҡа ирек бирмәй туҡтатыу. *Шаярған балаларҙы тыйыу. Көләүҙән тыйыу. Һөйләүҙән тыйыу.* ■ *Ниңә инде малайҙар Зифа апайҙы үсекләгәндә, уларҙы тыймаҡым икән?* К. Мәргән.

**2.** Үҙеңдәге теләк, кисерешкә ирек бирмәй баҫыу. *Күҙ йәшен тыйыу. Асыуҙы тыйыу. Өндәшмәй үҙеңде-үҙең тыйыу.* ■ *Хыялбай башындағы хыялдарын тыя алмай.* Ш. Бабич. **Ҡулды тыйыу** алыу, тотоу йәки һуғыу теләгенә ирек бирмәй баҫыу. **Телде тыйыу** әйтеү, һөйләү теләген баҫыу.

**3.** Рөхсәт итмәй туҡтатыу, ғәмәлдән алыу. *Закон тыйған эш. Газетаны баҫтырмай тыйыу. Урманды ҡырҡыуҙан тыйыу.*

**4.** Тынысландырыу, баҫылдырыу. *Илаған баланы тыйыу. Ярһыған атты тыйыу.* ■ *Тайфуров асыуы ҡабарған халыҡты тыйырға тырышты.* М. Тажи.

**ТЫЙЫУҺЫҘ** *с.* Тыйыла белмәҫ, шаян; тыймалыҡһыҙ. *Тыйыуһыҙ бала.*

**ТЫЙЫШЫУ** *ҡ.* Нindәйҙер эштән, ҡылыҡтан берен-бере тыйыу. *Урал буйында кешеләр .. аҡҡош аулауҙан тыйышып, аҡҡош тотоп ейməҫкә үҙ-ара һүҙ ҡуйышып, тыныс ғүмер иткән, ти.* «Урал батыр».

**ТЫҠ** *оҡш.* Ҡаты нәмәгә еңелсә һуҡҡанда йәки ҡаты нәмәләр бер-береһенә тейеп киткәндә сыҡҡан өҙөк тауышты белдергән һүҙ. *Тыҡ итеү. Тыҡ итеп килеп төшөү. Тыҡ итеп бәрелеү. Тыҡ итеп ҡалыу.*

**ТЫҠҠЫСЛАУ** *ҡ.* Төрлө яҡтан тығыҙлап тығыу. *Тәҙрә ярығына мамыҡ тыҡҡыслау. Өйҙөң мүген тыҡҡыслау.*

**ТЫҠЛЫҒЫУ** (тыҡлыҡ*ғ*) *ҡ. һөйл. кар.* **тығылыу** 4. *Тыҡлығып тороу. Тамаҡҡа тыҡлығыу.*

**ТЫҠРЫҠ** *и.* Өйҙәр араһынан оло урамға түтә сыҡҡан бәләкәй ҡыҫҡа урам. *Оҙон тыҡрыҡ. Тыҡрыҡ аша сығыу.* ■ *Бер нисә урамды арҡыры сыҡтыҡ. Тар тыҡрыҡтарҙан барҙыҡ.* А. Таһиров. *Тыҡрыҡ буйҙарын кесерткән һәм эрекмән ҡаплаған.* К. Мәргән.

**ТЫҠСЫУ** *ҡ. диал.* Тыңҡыслау. *Тыҡсып тултырыу.*

**ТЫҠ-ТЫҠ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат тыҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Тыҡ-тыҡ баҫып атлау.* ■ *Тыҡ-тыҡ килә сүйын тәгәрмәстәр, тып-тып тибә ярһып йөрәктәр.* Р. Ғарипов.

**ТЫҠТЫРЫУ** *ҡ. йөкм. кар.* **тығыу** 1—3,5. *Мунсаның төнлөгөн тыҡтырыу. Өҫтәлдең тартмаһын тыҡтырыу. Аяҡты йылы һыуға тыҡтырыу.*

**ТЫҠШАЙЫУ** *ҡ.* Башты баҫып, асыуланған һымаҡ аҫҡа ҡарау. *Бөтәһе лә, ауыҙына йөҙөк ҡапҡан һымаҡ, өндәшмәй тыҡшайып тик йөрөнөләр.* Ж. Кейекбаев.

♦ **Тыҡшайған** *йәки* **тыҡшайып ҡатҡан** башы яуырынына инеп торған, ҡыҫҡа муйынлы кешегә ҡарата әйтелә.

**ТЫҠШЫНЫУ** *ҡ.* **1.** Әрһеҙләшеп берәй урынға, кеше араһына инеү, эшкә тығылыу. *Тыҡшыныу йөрөү. Тыҡшыныу инеп килеү.*

**2.** Күп итеп ашау; тығыныу. *Ай-һай, күмәҫ бешерҙең, ыҡшындың да тыҡшындың* (Сеңләүҙән).

**ТЫҠШЫРМА** *и. һөйл.* Нәмәһен йыйып, йәшереп тотҡан һаран кешегә әйтелә.

**ТЫҠШЫРЫНЫУ** *ҡ. һөйл. кар.* **тыҡшырыу.**

**ТЫҠШЫРЫУ** *ҡ. һөйл.* Күренмәҫ ергә тығып ҡуйыу, йәшереү. *Еңгәкәй һалма бешерҙең, бешерҙең дә тыҡшырҙың* (Сеңләүҙән).

**ТЫҠЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Тыҡ-тыҡ иттереү, тыҡ-тыҡ иткән тауыш сығарыу. *Тыҡылдата баҫып бейеү. Тыҡылдатып һуғыу.*

**ТЫҠЫЛДАУ** *ҡ.* Тыҡ-тыҡ итеү, тыҡ-тыҡ килеү. *Вагон тәгәрмәстәре тыҡылдай. Пулемёт тыҡылдай.* ■ *Быуаның теге башындағы тирмән .. бер тигеҙ итеп талғын ғына тыҡылдай.* Н. Ҡәрип.

**ТЫҠЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. кар.* **тыҡылдау.**

**ТЫҠЫР** *оҡш.* Ҡытыршы, тешле нәмәләр бер-береһенә ышҡылып үткәндә, тигеҙһеҙ урындан ҡаты әйбер тәгәрәгәндә йәки автоматтан бер залп биргәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Тыҡыр итеп ҡалыу.* ■ *Ҡайҙалыр яҙында туптар гөрһөлдәй.. Уға пулемёт, мылтыҡ тауыштары ҡушыла. Тыҡыр-р-р, тыҡ-тыҡ.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТЫҠЫРЛАҠ** *и. иҫк.* Болғап әйрәлткәндә тыҡыр-тыҡыр итә торған ҡорал (ҡарауылсылар ҡулланған).

**ТЫҠЫРЛАТЫУ** *ҡ.* Тыҡыр-тыҡыр иттереү. *Тыҡырлатып ҡул тирмәнен әйләндереү.*

**ТАҠЫРЛАУ** *ҡ.* Тыҡыр-тыҡыр итеү, тыҡыр-тыҡыр килеү. *Ҡаты юлда тәгәрмәс тыҡырлап бара.*

**ТЫҠЫР-ТЫҠЫР** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат тыҡыр иткән дауамлы тауышты белдергән һүҙ. *Тыҡыр-тыҡыр итеү. Тыҡыр-тыҡыр әйләнеү.* ■ *Арбала тыҡыр-тыҡыр китеп барабыҙ.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**ТЫҠЫ-ТЫҠЫ** *оҡш.* Бер-береһенә ялғанып ишетелгән тыҡ-тыҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Тыҡы-тыҡы киндер туҡмау.* ■ *Тәгәрмәстәрҙең тыҡы-тыҡы килеп тәгәрәүҙәре .. алыҫ бала саҡты хәтерләтте.* Ф. Рәхимғолова.

**ТЫҠЫШ** *с. диал. кар.* **тыңҡыш** [1].

**ТЫЛ** [*рус.*] *и.* **1.** Фронт һыҙығының артындағы территория. *Тылға үтеү.* ■ *Башҡорт кавалерия дивизияһы Донбаста дошман тылында тәрән рейдта тиңһеҙ героизм күрһәткән өсөн гвардия исеме ал[ды].* Ә. Ихсан. / Берәй ғәскәри берекмә урынлашҡан ерҙең артындағы территория. *Батальон тылы. Армия тылы.* ■ *Разведчиктар .. отрядтың тылына киттеләр.* Ш. Бикҡол.

**2.** Илдең һуғыш ҡырынан артта ятҡан өлкәләре. *Тылда ятыу. Тылға ҡайтыу.* ■ *Тәрән тылда йәшәүселәр һуғыш афәттәрен иң башта тимер юлдан үткән ватыҡ паровоздарға ҡарап белделәр.* Ә. Байрамов.

**3.** Һуғышыусы хәрби көстәрҙән артта урынлашҡан, ғәскәрҙе бөтә кәрәк-ярак менән тәьмин итеп торған ярҙамсы хәрби көс (ылау, склад, элемтә, һ. б.).

**ТЫЛҠАУ** *ҡ. кар.* **тылҡыу.** *Кудряш һалҡын котлетты тылҡап аҙапланған булды.* Д. Исламов. *Бер-береһен күрә алмай кеше тылҡауҙан ялыҡҡан кешеләр, үпкәләүҙән туҡталып, бер яҡлы булып киттеләр.* Я. Хамматов.

**ТЫЛҠЫТЫУ** *ҡ.* **1.** Тылҡырға, имергә ҡушыу (быҙауҙы). *Быҙауҙан тылҡытып һауыу.*

**2.** *күсм.* Бер үк нәмәне ҡат-ҡат һөйләргә ирек ҡуйыу.

**ТЫЛҠЫУ** *ҡ.* **1.** Ныҡ сәйнәү, сәйнәп иҙеү. *Тылҡый-тылҡый ашау. Тылҡып йотоу. Тылҡып бөтөрөү.* / Ныҡ һурып тарта-тарта имеү (имсәк балаға, имгән малға ҡарата).

**2.** *күсм.* Бер үк нәмәне күп һөйләү, баҫым яһап ҡабатлау. *Тылҡып тороу.* ■ *[Саттаров:] Дөйөм түкләнеү тураһында уракка төшкәне бирле тылҡыйбыҙ инде. Хужа ҡолағына ла элмәй.* Я. Вәлиев. *Ҡаһымбай аңларға ла теләмәне, үҙенекен тылҡыны.* И. Ғиззәтуллин.

**3.** *күсм.* Кемдеңдер яманатын һатыу, яманлап һөйләү, сәйнәү. *[Ниса:] Тағы гәйбәт. һин, Етембай, ошолай кеше тылҡыуҙан ҡасан туйыпһың икән.* М. Хәйҙәров.

♦ **Ҡолаҡ итен тылҡыу** *шул ук* **ҡолаҡ итен ашау** (*ҡар.* **ҡолаҡ**).

**ТЫЛҠЫШЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **тығылыу** 3, 4.— *Тылҡышып йөрөмәгеҙ бында, господин поручик,— тип, Федор Егоров тупаҫ ҡына уны ситкә этәрҙе.* В. Исхаков.

**ТЫЛМАС** *и.* Үҙ-ара тел белмәгән кешеләрҙең һөйләшкәнен бер-береһенә тәржемә итеүсе; тәржемәсе. *Батырҙар теләктәрен әйтерҙәр ине, тел белмәйҙәр, тылмас та юҡ.* Ә. Чаныш.

**ТЫЛСЫМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Хөрәфәт буйынса, тәбиғи булмаған мөғжизәле үҙенсәлек; сихыр. *Тылсым көсө.* ■ *[Ат — Кирәйгә:] Былар бөтәһе лә һине алдап, һуңлатыу өсөн эшләгән, дейеүҙәрҙең тылсымы шулай.* З. Биишева.

**2.** Үҙенә арбаған серле үҙенсәлек. *Йыр тылсымы. Тәбиғәт тылсымы.*

**3.** Төрлө хәүефтәрҙән һаҡлау көсө булған нәмә; бетеү. *Тылсым итеп тағыу. Тылсым итеп йөрөтөү.* ■ *[Сания:] Киткән сағында уның рәсемен тылсым урынына тағып китергә онотма.* Д. Исламов.

**ТЫЛСЫМЛАНЫУ** *ҡ.* Тылсым көсөнә биреләү; сихырланыу.

**ТЫЛСЫМЛЫ** *с.* **1.** Тылсым (1 мәғ.) көсөнә эйә. *Тылсымлы кейем. Тылсымлы таяҡ.* ■ *[Ҡатын — иренә:] һине ҡыҙыл эткә әйләндергән тылсымлы сыбыҡ ана шул инде* (Әкиәттән).

**2.** Тәьҫир көсө, сере менән үҙенә арбаған. *Таң калам мин тауышыңа, ниндәй тылсымлы тауыш.* Ш. Бабич.

**ТЫМАҠ** *и. ҡар.* **томаҡ.**

**ТЫМАУ** *и.* Тын юлы шешеп танау тоноп, сөскөрткән ауырыу. *Ҡаты тымау. Тымау тейгән.*

**ТЫМАУЛАУ** *ҡ.* Тымау тейеп ауырыу.

**ТЫМБАҘАУ** *ҡ. һөйл.* Эҫергәнеп, әҙ генә тирләү. *Тымбаҙап ятыу.*

**ТЫМБАҘЫТЫУ** *ҡ. диал.* Тымпатлау.

**ТЫМПАТ** *с.* Болот баҫып торған елһеҙ, бөркөү (һауаға ҡарата). *Тымпат көн.* ■ *Иртәнге тымпат һауала ауыл дөрләп яна башланы.* Ғ. Ибраһимов.

**ТЫМПАТЛАУ** *ҡ.* Тымпатҡа әйләнеү, тымпат булыу. *Көн тымпатлап тора.*

**ТЫМЫҒЫУ** [тымыҡ*ҡ*] *ҡ.* Томаланып йомшаҡ ҡына бығыу. *Һурән утта тымығып ҡына сәй беште.* Й. Солтанов.

**ТЫМЫҘЫҠ** *с.* **1.** Хәрәкәте әкрен генә булған, көслө булмаған (ел, ямғырға ҡарата). *Тымыҙыҡ ел. Тымыҙыҡ ямғыр.*

**2.** *ҡар.* **тымыҡ.** *Тымыҙыҡ һауа.* // *Йәйге тымыҙыҡ.* ■ *Ниндәй матур тымыҙыҡ көн бөгөн, ерҙе наҙлап ҡояш йылмая.* Ш. Бикҡол.

● *Тымыҙыҡ күлдә ҡорт ятыр.* Мәҡәл.

**ТЫМЫҘЫҠЛАНЫУ** *ҡ.* Тымыҡҡа әйләнеү, тымыҙыҡ булыу. *Буран тамам баҫылған, һауа тымыҙыҡланып, матурланып киткән ине.* Д. Юлтый.

**ТЫМЫҘЫУ** *ҡ.* Илауҙан туҡтатыу. *Баланы тымыҙыу.*

**ТЫМЫЙЫҠ** *с. диал.* Тымыҙыҡ. *Тымыйыҡ көн. Тымыйыҡ күл өҫтө.*

**ТЫМЫҠ** *с.* **1.** Елһеҙ, тыныс; тын. *Тымыҡ көн. Тымыҡ һауа.* // *Киске тымыҡ.* ■ *Һауа тымыҡ. Япраҡ ҡағырлыҡ ел юҡ.* Д. Юлтый.

**2.** Бик яй аҡҡан йәки тулҡынһыҙ тыныс ятҡан. *Тымыҡ күл. Тымыҡ һыу.* ■ *Елдәр иҫһә, тымыҡ диңгеҙ йырлай башлай, елдәр иҫһә, тып-тын торған урман шаулай.* М. Басыров.

**ТЫМЫРҺЫҠ** *с. диал.* **1.** Тымпат. *Тымырһыҡ көн.*

**2.** *күсм.* Аҫтыртын. *Тымырһыҡ кеше.*

**ТЫМЫУ** *ҡ.* **1.** Булыу көсө кәмеп туҡтау, баҫылыу, тыныу (ел-ямғырға ҡарата). *Ел тыма. Ямғыр тыма.* ■ *Буран тымған. Ел эҫәре юҡ.* Н. Мусин. / Бөтөү, туҡтау, ишетелмәй башлау (тауышҡа ҡарата).

**2.** Илауҙан туҡтау; шым булыу. *Бала тымды.* ■ *Сеү, тым, Ғәйшә! Юҡҡа илама!* Ғ. Сәләм.

**ТЫН** [1] *и.* **1.** Тере йән эйәләренең эскә кислород, тышҡа углекислый газ сығарыуы; үпкә аша һауа йөрөшө; һулыш. *Тын юлдары. Тын туҡтау. Тын етмәү. Тынды тотоу.* ■ *Шахтёрҙар алға шыуған һайын тындары ҡыҫыла, һауа етмәй.* Я. Хамматов. *Тауышы саф, тыны оҙон уның: күпме тыңлаһаң да ялҡытмай.* Н. Мусин. / Үпкәлә йөрөгән, үпкәгә инеп сыҡҡан һауа. *Ҡайнар тын. Тын менән йылытыу.* ■ *Дейеү тыны менән илселәрҙе бер ары, бер бире өрөп йөрөткән* (Әкиәттән). **Тын алыу** 1) үпкәгә һауа алыу, һулыш алыу. *Йыш-йыш тын алыу. Тәрән итеп тын алыу;* 2) кислород үҙләштереү (үҫемлектәргә ҡарата); 3) ял итеү. *Тын алмай эшләү.* ■ *Оҙаҡ дәрес әҙерләп ултырғандан һуң, әҙерәк тын алайым тип, коридорға сыҡтым.* Ә. Вәли; 4) *күсм.* еңеллек һиҙеү. *Дауыл тынған. Ҡала халҡы иркен тын алып, урамға сыҡҡан* (Әкиәттән); 5) *күсм.* фекер йөрөтөү, эш итеү. *Заман менән бергә тын алып йәшәргә кәрәк.* М. Тажи. **Тын бөтөү** 1) һулыш алыу туҡтау; 2) хәл бөтөү. **Тынды ҡурыу** тын алышын ауырлаштырыу; тынды ҡыҫыу. *Ҡоро һауа тынды ҡура.* З. Биишева. **Тынды үрә алыу** 1) тынды ауыр алыу, ҡыйынлыҡ менән һулау; 2) *күсм.* ғорур, һауалы ҡиәфәт менән ултырыу. **Тын ҡурылыу** тын алыуы ауырлашыу; тын ҡыҫылыу. *Тауға менгән сакта тын ҡурыла, ҡүкрәк ҡыҫыла.* Ғ. Хәйри. / *күсм.* Ниҙеңдер һауа йөрөшө менән таралған шауҡымы; һулыш. *Ҡар тыны. Дала тыны. Яҙ тыны һиҙелә. Мәғәрәнең һалҡын тыны бәрелә.*

**2.** *һөйл.* Йән эйәһенә хас тауыш, өн. *Тыныңды ла сығарма, шым ғына ултыр.*

**3.** *кусм.* Эске ниәт, йәшерен уй. *Кешенең тынын белеү.* ■ *Рәхимә картының .. тынын якшы һиҙе. Шуға күрә уның ыңғайына һыпыра.* Һ. Дәүләтшина. **Тын алышы** кемдеңдер уй-ниәте. *[Батырша] халыктың тын алышын тыңлап, күңеленә һалып йөрөй.* Ғ. Хөсәйенов.

♦ **Тын алырға ирек бирмәү** *йәки* **тын** да **алдырмау** бик нык ашыктырыу. **Тын да алмай** ҙур иғтибар менән. *Тын да алмай тыңлау.* **Тын менән тартып алырҙай булыу** нык һағынып, күрге килеү. **Тын тарығыу** *кар.* **тарығыу** [1]. **Тыны ла сыкмай** кеше үҙен бик баҫалкы, йыуаш тотканда әйтелә. *[Ямакаев:] Өйҙә тыны ла сыкмаған бала, мәктәпкә килдеме, боҙола башлай.* Я. Вәлиев.

**ТЫН** [2] *с.* **1.** Шау-шыу, тауыш булмаған, тынлык урынлашкан. *Тын иртә. Тын урман.* ■ *[Аттар кыңғырауҙарҙың] көмөш тауышы менән тын ауыл урамын ярҙырып тоҡойоп сығып киттеләр.* Ғ. Дәүләтшин. *Алтын нурын һибеп тәбиғәткә мәҙе төштө. Донъя булды тын.* Х. Ғәбитов. **Тынға калыу** (*йәки* **тарығыу**) шау-шыу бөтөп тынып калыу; тынлыкка сумыу. *Тынға калды урман, таллыктар.* С. Кудаш. *Һалам такыя кейгән тәпәш өйҙәр тынға тарығып, төндө хуплайҙар.* Ғ. Амантай.

**2.** Бик яй хәрәкәтле йәки хәрәкәтһеҙ; тыныс. *Тын диңгеҙ. Тын күл. // Тын ағыу. Тын ғына яуыу.* ■ *Күңеле килһә, аға тын ғына, күңеле килһә, аға бик ярһыу минең эскән һыуым Һакмар һыу.* Й. Солтанов. *Ағиҙелкәй һыуы ай тын икән, яр ситтәре лә шул комло икән* (Халык йырынан). | Елһеҙ, тыныс булған; тымык. *Әҫе һүрелгән, һауа бик тын.* Б. Бикбай. *Тын ғына, тып-тымык бер төн ине.* Ш. Бабич.

**ТЫН** [3] *с.* **1.** Тапалып такырланмаған, көртлө (юлға карата). *[Директор Рамазанға:] Эшең кабалан булғас, китерһең инде. Тик бына юл бик тындыр бит әле.* Н. Мусин.

**2.** Һөрөлмәгән, һөрөлмәй калған (ергә карата). *Тын ер. // Ерҙе тын яткырыу.*

**3.** Эшләп йәки йөрөп йонсомаған (малға карата). *Буш йөрөгән тын мал.* ■ *Болғауҙа торған тын ат шул тиклем сабыуға түҙәме ни? Ат аяғын һуҙған.* Б. Бикбай.

**ТЫН** [4] *с.* **1.** Тартылмаған, вакланмаған, бөтәү, (ашлыкка карата). *Тын арыш. Тын бойҙай.*

**2.** *һөйл.* Ярмаһы бешеп иҙелмәгән (ашка карата). *Тын бутка.*

**ТЫН** [5] *и.* Ишкән, сираткан бау кеүек нәмәнең бер каты. *Өс тындан ишкән аркан.*

**ТЫН** [6] *и. кар.* **тына.** *Бер тына эшләү. Бер тында эсеп бөтөү.*

**ТЫНА** *и.* Һан менән килеп, бер туктағандан икенсе туктағанға тиклемге эш-хәрәкәт вакытын белдерә. *Бер тына эшләү. Ике тыналык эш.* / Эш-хәлдең кабатланыуы иҫәбен белдерә. *Ике тына ял итеү.*

**ТЫНАНАН** *р. диал.* Бер тынала, бер юлы. *Тынанан әйттем дә куйҙым.*

**ТЫНҒЫ** *и.* Тән һәм йән тыныслығы, тынғылык. *Тынғы юк.* ■ *Калала мин тынғы тапмайым. Кыҫка төнлө йәйге айҙарҙа ... аяктарым тарта тауҙарға.* С. Кулибай. **Тынғы бирмәү** кемгәлер тынысланып йәшәргә ирек бирмәй борсоу. *Тынғы бирмәгән уй.* ■ *Тынғы бирмәҫ ахун инең, күстеңме ни тыныска?* (Халык йырынан). *Йөрәгем һис тынғы белмәй, гел генә тулкынлана.* А. Игебаев. **Тынғы күрмәү** төрлө эш, мәшәкәттәрҙән айный алмау. *Йылкы, йылкы, Йылкыбай .. тынғы күрмәй мал менән* (Халык йырынан). **Тынғы күрһәтмәү** *кар.* **тынғы бирмәү.**

**ТЫНҒЫЛЫК** *и. кар.* **тынғы.** *Өйҙә тынғылык юк. Тынғылык белмәү. Тынғылык бирмәү.* ■ *Дан да, тынғылык та эҙләмәнем.* В. Әхмәҙиев.

**ТЫНҒЫҺЫҘ** *с.* **1.** Тыныс тормаҫ, тынғы белмәҫ; тыныс̧һыҙ. *Тынғыһыҙ кеше.* ■ *Балаң бик тынғыһыҙ, ала бит маҙаңды.* М. Кәрим. / Тынып тормаған, һәр вакыт хәрәкәттә булған. *Тынғыһыҙ океан булып йырҙарҙа калһын йөрәк.* М. Харис.

**2.** Тынғы бирмәгән, мәшәкәтле. *Тынғыһыҙ тормош. Тынғыһыҙ эш. Урак вакыты тынғыһыҙ мәл.*

**ТЫНҒЫҺЫҘЛАНЫУ** *к.* Тынғыһыҙға (1 мәғ.) әйләнеү, тынғыһыҙ булыу. *[Полковник:] Кеше картайһа, шулай тынғыһыҙлана башлайҙыр, ахыры .. Бер урында ғына көтөп ултырырға түҙемлек етмәй.* М. Кәрим.

**ТЫНҒЫҺЫҘЛАУ** *к.* Тыныслык бирмәй борсоу; тыныс̧һыҙлау. *[Шатморат:] Мин уны [Карлуғасты] .. урманға, тауҙар араһына алып китермен. Унда иркен. Берәү ҙә тынғыһыҙламаҫ.* Б. Бикбай.

**ТЫНҒЫҺЫҘЛЫК** *и.* Төрлө уй, мәшәкәт, эш аркаһында булған борсоулы хәл. *Тынғыһыҙлык кешегә бер килһә, тиҙ генә китмәй инде ул. Йә уй, йә шик булып, күңелде биләп ала ла, ебәрмәй.* К. Мәргән.

**ТЫНДЫРЫУ** *к.* **1.** Төрлө кисерештәрҙән арындырып тыныс хәлгә килтереү; тынысландырыу. *Йә хоҙай, үлтер мине, тындыр мине, тип сир көтә [бабай].* Ш. Бабич.

**2.** Эш-хәрәкәттән туктатып ял иттереү. *Әсәйем .. туктауһыҙ эшләп арыған тәндәрен тындырырға уйлап тора ине.* С. Кудаш.

**3.** Тыныслыкта калдырыу, борсоп интектермәү. *Шайтан Алдарҙы тындырмай, кайҙа барһа ла тегенең алдына килә лә сыға, ти* (Көләмәстән).

**ТЫНЙЫУ** [1] *к. диал. кар.* **тынсыу** [2]. *Бәләкәй булмә тынйый.*

**ТЫНЙЫУ** [2] *с. диал. кар.* **тынсыу** [3]. *Тынйыу һауа.*

**ТЫН-КӨН: тыны-көнө бөтөү** *диал.* кабаланыуҙан тын курылыу. *Шәп йүгереүҙән тыны-көнө бөткән Миңһылыу .. кайтып керҙе.* Ә. Байрамов.

**ТЫН-КАРЫУ** *и. йыйн.* Йөрәк тибешенә, тын иркенлегенә бәйле сыҙамлык. *[Кайһы бер] йүгеректең тын-карыуы бары дүрт-биш сакрымға ғына етә.* С. Кулибай.

**ТЫНЛЫ** *с.* Өрөп уйнамалы. *Тынлы музыка коралы.* / Өрөп уйнай торған музыка коралдарынан ойошторолған. *Тынлы оркестр.*

**ТЫНЛЫК.** *и.* Тауышһыҙ тып-тын хәл. *Киске тынлык. Тынлыкка сумыу. Бүлмәне тынлык баҫты.* ■ *Тынлык эсендә кылт иткән тауыш та Рәмиғә мылтык атылған кеүек тәьҫир итә.* Х. Мохтар. *Тынған ине кайын, тирәктәр. Тын-*

*лыктың да теле матур икән, һөйләштеләр беҙҙең йөрәктәр.* М. Хәй.

**ТЫНСЫУ** [1] *к. һөйл. кар.* **тынысланыу 1.** *Ойоп ятҡан Хисмәтулла, йәрәхәте һыҙлауҙан тынсып, тәүге тапҡыр күҙҙәрен йомдо.* Я. Хамматов.

**ТЫНСЫУ** [2] *к.* **1.** Ел теймәй томаланып тороуҙан һауаһы насарланыу; тонсоу. *Тынсыған бүлмә.* ■ *Өй эсе ҡаҙандан сыҡҡан быу, тәмәке төтөнө, кеше тыны менән әҫеп, тынсып китте.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Томаланыуҙан еҫләгә әйләнеү, һаҫыу; тонсоу. *Тынсыған еҫ. Күлде ҡамыш баҫты, тынсыны.*

**ТЫНСЫУ** [3] *с.* **1.** Кислород аҙ булыуҙан тын алыу өсөн ауыр булған, тынды тарыҡтырған, тонсоу. *Тынсыу бүлмә. Тынсыу һауа.* ■ *Палата башҡа көндәргә ҡарағанда ла тынсыуыраҡ. Тын ҡыҫыла, һауа етешмәй.* Р. Низамов. / Әҫе, томра. *Тынсыу көн. Тынсыу әҫелек.* / *күсм.* Бер ниндәй ҙә үҙгәреш кисермәй баҫылып ятҡан, торғонлоҡ кисергән. *Башҡорт халҡы быуаттар төпкөлөнөң иң тынсыу ҡараңғылығында иңрәгән саҡта ла яҡтылыҡ, гүзәллек тураһында хыял итеүҙән туҡтамаған.* З. Биишева.

**2.** *һөйл.* Һаҫыған, һаҫыҡ (һыуға ҡарата). *Тынсыу һаҙ. Тынсыу күл.*

**ТЫН-ТАУЫШ** *и. кар.* **тауыш-тын.**

**ТЫН-ТӘҠӘТ: тын-тәҡәт бирмәү** кешене үҙ иркенә ҡуймай ҡабаландырыу, тынғыһыҙлау. *[Ғәләм:] Ниңә әле былай, тын-тәҡәт бирмәй, дөрөп алып бараһың?* С. Кулибай.

**ТЫНҺЫҘ** *с.* Һулышы булмаған, йәнһеҙ. *Тынһыҙ булыу.* // *Тынһыҙ ҡалыу. Тынһыҙ ятыу.* ■ *Ул нисек йылыныр тынһыҙ һалҡын мендәр ҡосаҡлап.* Ғ. Сәләм.

**ТЫНЫҒЫУ** (тыныҡ*ғ*) *к.* **1.** Ял итеп хәл алыу (малға ҡарата). *Ерән ат тыныҡҡан, екһәң дә ярай.*

**2.** Һыуынып, һурығып саҡ ҡына ҡатыңҡырау (иткә ҡарата). *Тыныҡмаған ит тәмһеҙ була.*

**3.** *диал.* Тумбыу, тумбығыу. *Аҙнаев тынығып киткән аяғынан итеген systе.* Н. Мусин.

**ТЫНЫС** *с.* **1.** Ығы-зығыһыҙ, шау-шыуһыҙ; тын. *Иртәнге тыныс ваҡыт. Тыныс урам. Өй эсе тыныс.* // *Тыныс ултырыу.* ■ *Тирә-яҡ тыныс. Тәбиғәт йоҡоға сумды.* Я. Хамматов. *Тыныс ятҡан ауыл кис менән гөжләп китте.* Һ. Дәүләтшина. / Тынлыҡ хөкөм һөргән, тын ятҡан. *Тыныс дала. Кеше аяғы баҫмаған тыныс ялан.*

**2.** Тауыш-ғауғаһыҙ, дау булмаған. *Тыныс донъя. Тыныс ғаилә тормошо.* // *Тыныс ғүмер һөрөү. Йыйылыш тыныс үтте.* ■ *Сәғиҙәгә Ҡарамалы .. шау-шыуһыҙ тыныс ҡына тормош менән йәшәп ятҡан бер ауыл булып тойолдо.* М. Тажи. / Хәрби булмаған, имен. *Тыныс төҙөлөш. Тыныс хеҙмәт.* ■ *Күктә тыныс, бында һуғыш.., бында әштәр күрҡыныс.* Ш. Бабич. *Йәшә тыныс тормош, тоҡанмаһын һуғыш.* Ш. Бикҡол.

**3.** Төрлө хәүеф-хәтәр, борсоу, ҙур мәшәҡәттәре булмаған. *Тыныс эш. Тыныс картлыҡ.* // *Тыныҫҡа сығыу.* // *Тыныс йәшәү.* ■ *Яңы ғаилә тыныс ҡына йәшәп ятҡанда илгә яу килә.* К. Мәргән. *[Халыҡ дейеүгә:] Беҙҙән ни хәтле түләү түләтһәң дә ризабыҙ, тик беҙҙе тыныс ҡалдыр, тигән* (Әкиәттән).

**4.** Ниндәйҙер кисереш, борсолоуҙар менән болоҡһомаған, тулҡынланмаған. *Тыныс күңел. Тыныс йөрәк. Тыныс булыу.* // *Тыныс йөрөү.* ■ *Эштә саҡта әле күңел тыныс, албырғата һине күп әйбер.* Ғ. Сәләм. *Ғишыҡһыҙҙың йәне тыныс, ятһа үлеп йоҡлайҙыр* (Халыҡ йырынан). / Кешенең ошо хәлен сағылдырған. *Тыныс тауыш. Тыныс күҙҙәр.* // *Тыныс һөйләшеү. Тыныс йоҡлау.* ■ *Айырылдыҡ беҙ. Күҙең ҡарашы тыныс ине һинең.* Х. Ҡунаҡбай.

**5.** Сабыр тәбиғәтле, баҫалҡы. *Тыныс кеше.* / Шундай кешегә хас. *Тыныс холоҡло.* ■ *Тәрән күлдәй тыныс аҡылығыҙ [миңә] серҙәш булыр.* М. Кәрим. / Кешене борсомаған, тынғыһыҙ булмаған. *Тыныс бала. Тыныс күрше.*

**6.** Яй хәрәкәтле йәки хәрәкәтһеҙ; тын, тымыҡ. *Тыныс диңгеҙ.* // *Йылға тыныс аға. Күл тыныс ята.*

**7.** Елһеҙ, тын. *Йәйҙең тыныс көнө.* // *Тыныс тороу.* ■ *Төн тыныс үтһә, ҡасан да көндөҙөндә ел сығыр.* Ш. Бабич.

♦ **Тыныс булығыҙ** борсолмаҫҡа йәки шауламаҫҡа өндәгәндә әйтелә. **Тыныс йоҡо** *кар.* **йоҡо** [1].

● *Белмәгәндең беләге тыныс.* Мәҡәл. *Йәшлегең тырыш булһа, картлығың тыныс булыр.* Мәҡәл.

**ТЫНЫСЛАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Кем йәки нимәнеләр билдәле бер эш-хәлдән туҡтатып, тыныс хәлгә килтереү, шым итеү. *Илаған баланы тынысландырыу.* ■ *[Һунарсы] ярһып өргән этен тынысландырғас, егеткә ҡысҡырҙы.* Я. Хамматов.

**2.** Ауыр кисереш һәм борсолоуҙан туҡтатып, тыныс хәлгә килтереү. *Күңелде тынысландырыу.* ■ *Зыя Сәғиҙәнең борсолғанын һиҙеп, тынысландырырға тарышты.* М. Тажи.

**ТЫНЫСЛАНЫУ** *к.* **1.** Борсоған эш-хәлдән, ауыр кисерештән, ярһыуҙан араланып, тыныс хәлгә килеү. *Асыу баҫылып тынысланыу. Тынысланып йоҡлау. Күңел тынысланыу.* ■ *Һуғыш бөткән, тынысланған халыҡтар.* Ш. Бабич. / Бошонмау, тыныслыҡ кисереү. *Һеҙ һуғыш ваҡытында ни эшләп, тынысланып ауылда йөрөйһөгөҙ әле?* Д. Юлтый.

**2.** Ығы-зығы, шау-шыу туҡталып, тыныс хәлгә килеү. *Тынысланырға сакырыу.* ■ *Бер аҙҙан сход тынысланды.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Тауыш-ғауға, дау, болалар туҡталып, тәртипһеҙлектәр бөтөп, тыныс хәлгә килеү. *Инде донъялар бер аҙ тынысланды.* Ғ. Дәүләтшин.

**4.** Яй хәрәкәтле йәки хәрәкәтһеҙ хәлгә килеү. *Диңгеҙ тынысланған.*

**ТЫНЫСЛАТЫУ** *к. кар.* **тынысландырыу.**

**ТЫНЫСЛАУ** *к.* **1.** Борсоған эш-хәлдән, ауыр кисерештәрҙән арынып, еңеллек һиҙеү, тыныс хәлгә килеү. *Тынызлап йоҡлау. Тынызлап ҡалыу. Эште бөтөрөп тыныслап йөрөү.* ■ *Бөгөн [Иштуған] иркенләп, тыныслап уҡыта алманы. Балаларға үҙ аллы эш биреп, оҙаҡ уйланып ултырҙы.* З. Биишева.

**2.** Кемдән йәки нимәнәндер ҡотолоп тыныс хәлгә килеү. *Муллалар картҡа килмәҫкә ант иткән. Шунан бире карт та муллаларҙан тыныслап ҡалған* (Әкиәттән).

3. *кар.* **тынысландырыу** 2. *[Акназар менән Гөлбоҫтан] быйылғы арышты йыйып алып.., күңелдәрен тыныслап, алдағы көнгә пландар кор[ҙо].* Ғ. Дәүләтшин.

**ТЫНЫСЛЫҠ** *и.* **1.** Төрлө хәрәкәт, ығы-зығы булмаған, тауышһыҙ тыныс хәл. *Тыныслыҡ һаклау.* ■ *Һеҙ нишләп .. һыҙғырып ултыраһығыҙ, тынысылыҡты боҙаһығыҙ?* Н. Ҡәрип. *Шомло тауыштар баҫылды. Урманда тағы тынысылыҡ урынлашты.* Я. Хамматов.

**2.** Яу, болалар булмаған тыныс хәл; именлек. *Ил тынысылығы. Тынысылыҡты һаклау. Тынысылыҡ өсөн көрәш.— Лотфи ил тынысылығын емергән фашистарға ҡаршы һуғышҡа китте.* С. Агиш.

**3.** Төрлө хәстәр, мәшәҡәтле эш, бимазалар булмаған тыныс хәл. *Тынысылыҡты алыу. Тынысылыҡ биреү. Тынысылыҡ табыу.* ■ *Ҡалдыр мине, ҡалдыр тынысылыҡта, сәстәреңә мине бәйләмә.* Ғ. Хәйри.

**4.** Төрлө кисерештәр менән борсолмаған, ғазапланмаған тыныс хәл. *Йоҡо тынысылығы. Йән тынысылығы. Күңел тынысылығы. Тынысылыҡты юғалтыу.* ■ *Ниңәлер гел моңланам, ҡайғы-хәсрәт, моң вә зарлыҡтар менән, юҡ тынысылыҡ, тулғанам да тулғанам.* Ш. Бабич. *[Барсынһылыу:] Батыр егет Алпамыша, йөрәгемә ут һалдың, .. тынысылығым һин алдың.* „Алпамыша".

**5.** Кешенең үҙен сабыр, тыныс тотҡан хәле. *Эске тынысылыҡ. Тынысылыҡ менән яуап биреү.*

**ТЫНЫСҺЫҘ** *с.* **1.** Ығы-зығылы, шау-шыулы. *Тынысһыҙ урын.*

**2.** Яу, болалар булып торған, имен булмаған. *Тынысһыҙ ваҡыт.*

**3.** Төрлө бимазалары булған, мәшәҡәтле. *Тынысһыҙ эш.*

**4.** Борсоулы, тынғы тапмаған. *Тынысһыҙ күңел.*

● *Осһоҙҙоң арты тынысһыҙ.* Мәҡәл.

**ТЫНЫСҺЫҘЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Тынысһыҙланырға, борсолорға мәжбүр итеү. *Саҡайҙың һүҙҙәре Гәрәйҙе ығата тынысһыҙландырҙы.* Б. Бикбай.

**ТЫНЫСҺЫҘЛАНЫУ** *ҡ.* Нимәгәлер борсолоп, тынысылыҡты юғалтыу; тынысһыҙ булыу. *Күңел тынысһыҙлана. Тынысһыҙланып көтөү.* ■ *Сәгиҙәнең йөрәге жыу итеп, тәне сымырлап китте. Ул тынысһыҙланғанын балаларға һиҙҙермәҫ өсөн үҙен ҡулға алды.* М. Тажи.

**ТЫНЫСҺЫҘЛАУ** *ҡ.* Тынысылыҡ бирмәй борсоу; тынғыһыҙлау. *Беҙҙең көндәр быйылғы ирек менән иҫереп үтә. Һис бер тынысһыҙлаған, борсоған кеше юҡ.* Д. Юлтый.

**ТЫНЫСҺЫҘЛЫҠ** *и.* **1.** Төрлө хәрәкәттәр булып, кешеләр ығы-зығы килгән шау-шыулы хәл. *Тынысһыҙлыҡ көсәйеү.* ■ *Урядник сығып: — Сәгди Япаров! — тип ҡысҡырҙы. Был исемде ишеткән халыҡ араһында тағы ла .. тынысһыҙлыҡ тыуҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Илдең именлеген бөтөргән төрлө сыуалыш, даулы хәл. *Тынысһыҙлыҡ тыуҙырыу.* ■ *Буләр хан: — Яңғыҙ йөрөмә, Ҡолтубә, именлек ҡарарға сығып, тынысһыҙлыҡ килтерерһең,— тип әйтте, ти* (Әкиәттән).

**3.** Тынғы таба алмай борсолған хәл. *Йән тынысһыҙлығы.* ■ *Ҡан ҡоҫто йәш бала. Йәм китте, тынысһыҙлыҡ алды бүлмәне.., өс төн эсә йоҡо күрмәне.* М. Хәй.

**ТЫНЫУ** *ҡ.* **1.** Һөйләү, ҡысҡырыу, һайрау, илауҙан һ. б. туҡтау, шым булыу. *Өндәшмәй тынып ҡалыу. Йырламай тынып тороу.* ■ *Беҙҙең арала һүҙ бөттө. Барыбыҙ ҙа тындыҡ.* Д. Юлтый. *Ике-өс әтәс бер-бер артлы ҡысҡырыштылар ҙа тағы тындылар.* Я. Хамматов. / Ниндәй ҙә булһа геүләгән, шаулаған, яңғыраған тауыш бөтөү, туҡтау, ишетелмәү. *Алҡыштар тынды. Ура тауыштары тынды. Аяҡ тауышы тынды.* ■ *Тотош боҙ ҡапланы Иҙелде, тынды унда аҡҡош тауыштары.* К. Бакиров. / Төрлө хәрәкәт, шаушыу бөтөп тын ҡалыу. *Урам тынды. Дала тынды.* ■ *Ҡала бөтөнләй тынды.. Аяҡ тауыштары ишетелмәй, баҫылды.* С. Агиш. *Бер нисә минутҡа кабинет тынып ҡалды.* Ә. Бикчәнтәев.

**2.** Хәрәкәт итеүҙән, эшләүҙән, йөрөүҙән туҡтау. *Сәғәт тынды.* ■ *Тимерҙең радиоприемнигы .. [көсө бөтөп], нисәмә көн инде тынып ултыра.* Б. Бикбай. *Йөрәк тынды, башҡа типмәне.* М. Кәрим. *Һалдат тынған.. Ул ғүмерен биреп, киптәргә бит йәшәү килтерҙе.* Н. Нәжми. / Хәрәкәте көсһеҙләнеп тыныс хәлгә килеү. *Ҡул тынды.* ■ *Диңгеҙ тына. Тау-тау тулҡындар, ҡанаты һынған ҡарағош шикелле хәлһеҙләнеп, һуҙылып ята.* З. Биишева. *Һыуҙың ҡайнап аҡмаҫтай, тулҡынын да ҡаҡмаҫтай, тынған сағы бар булыр* (Ҡобайырҙан).

**3.** Көсө кәмеп, ғәмәлдә булыуҙан туҡтау, баҫылыу, тымыу (ел-ямғырға ҡарата). *Ямғыр тынды. Ел тынды.* ■ *Буран ҡайһы берҙә көсәйә, ә ҡайһы берҙә бөтөнләй тынып .. ҡала.* Ғ. Ғүмәр.

**4.** Һуғыш, алыш, дау кеүек күренештәргә бәйле эш-хәрәкәттәр баҫылыу йәки ваҡытлыса туҡталып тороу. *Атыш тынды. Һуғыш тынды.* ■ *Көнө-төнө кукҡән уҡ яуҙы, белмәйенсә тыныу, туҡтауҙы.* М. Кәрим.

**5.** Тынғы табыу, тынысланыу. *Йән тынмай.* ■ *Ирмен тигән ир-егет ат уйнатмай тынырмы?* (Ҡобайырҙан).

**6.** Эштән туҡтау, ял итеү. *Йәй буйы эшләгәндән һуң бәләкәс тынып алғанда ла булыр ине.* Ғ. Дәүләтшин.

**7.** Кемдән йәки ниҙәндер ҡотолоп, арынып, тынысланыу. *Тауыштан ҡолаҡ тынмай.* ■ *Бабай менән әбей малайҙан тынып, бер рәхәтләнеп сәй эсәйек, тип ултырған, ти* (Әкиәттән).

◆ **Эстән тыныу** уйлап ҡына ҡуйыу, өндәшмәү. *Эстән тындым: алдана беҙҙең мужик ахмаҡ тиеп.* Ш. Бабич.

**ТЫНЫУ** *и.* Ауыҙ-морондан килгән һауа; тын. *Йылы тыныу.* ■ *Арттан килгән аттың тыныу ялҡыны алдағы йүгеректәрҙең ҡарыуын ҡайтара.* С. Кулибай.

**ТЫНЫШ** *и.* Эштең, һүҙҙең һ. б. барышында аҙ ғына ваҡытҡа яһалған туҡталыш; пауза. *Тыныш яһау.* ■ *[Офицер] „да", тип әҙерәк тыныш яһыны ла, миңә тура ҡарап, һүҙ башланы.* Д. Юлтый.

◆ **Тыныш билдәһе** *грам.* Һөйләмдәге мәғәнә айырымлыҡтарын билдәләгән график тамға.

**ТЫНЫШЫУ** *ҡ.* Үҙ-ара талаш-тартышһыҙ, тыныс мөнәсәбәттә булыу. *Тынышып йәшәү.*

■ *Бер район үҙәгендә ике хужа тыныша алманы.* Р. Низамов.

**ТЫҢ** *и. иҫк.* Хәбәр, һүҙ. *Муллалар сагыр эсеп, зина ҡылғай. Бындан артыҡ дәхи ғәжәп тыңдары бар* (Мөнәжәттән).

**ТЫҢҒЫР-ТЫҢҒЫР** *окш. ҡар.* **дыңғыр-дыңғыр.**

**ТЫҢҠАУ**[1] *с. һөйл.* Тыңҡыш, һиңрәү. *Тыңҡау кеше. Тыңҡау булыу.*

**ТЫҢҠАУ**[2] *и. диал.* **1.** Картуф алмаһы (*ҡар.* **картуф** 1).

**2.** *ҡар.* **тыңҡауыҡ** 1.

**ТЫҢҠАУЫҠ** *и.* **1.** Имән япрағына сыҡҡан оро, имән япрағының сире.

**2.** *диал.* Имән сәтләүеге.

**ТЫҢҠЫСЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **тыңҡыслау.** *Утын .. мейес араһындағы буш урынға тыңҡысланған.* М. Тажи.

**ТЫҢҠЫСЛАУ** *ҡ.* **1.** Тығыҙлап, ҡыҫтап-ҡыҫтап тығыу. *[Бабай:] Йылы сыҡмаһын өсөн уны [төнлөктө] тыңҡыслап ҡуйҙым.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Баҫып-баҫып, ҡыҫтап-ҡыҫтап тығыҙлау; нышыу. *Тыңҡыслап тығыу. Тыңҡыслап тултырған тоҡ.* ■ *Тимер алып ингән утынын мейес артына тыңҡыслап тултырып ҡуй[ған].* Б. Бикбай.

**ТЫҢҠЫШ**[1] *с.* Йыуан ҡыҫҡа муйынлы. *Ике кеше ултыра. Береһе — нәзек оҙон буйлы, ас яңаҡлы, ә икенсеһе — тәпәшәк кенә кәүҙәле тыңҡыш әҙәм.* Ҡ. Ибәтуллин.

**ТЫҢҠЫШ**[2] *с.* **1.** Танау аша һөйләшкән; һиңрәү. *[Әҙһәм] тыңҡыш.., һүҙҙә „к" өнө башта килгәндә „н" тип, „б" өнө килгәндә „м" тип әйтә ине.* С. Агиш. / Ошондай кешегә хас. *Хәҙрәт тыңҡыш тауыш менән тәкбир әйтә башланы.* Ғ. Хәйри.

**2.** Тоноп, мығырлап торған (танауға ҡарата).

**ТЫҢҠЫШЛАНЫУ** *ҡ.* Тыңҡышҡа[2] әйләнеү, тыңҡыш булыу.

**ТЫҢЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **тыңлау** 1—3. *Күп тапҡыр тыңланған әкиәт.* ■ *Хат .. уҡылды ла, тыңланды ла бер нисә ҡат.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ТЫҢЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** Нимәнелер тыңларға, ишетергә мөмкинлек биреү. *Балалар шаулап, радионы тыңлатмайҙар.*

**2.** Ҡушҡанды, бойорғанды үтәтеү, үтәргә күндереү, әйткәнде эшләтеү. *Баланы тыңлатып булмай.*

**ТЫҢЛАУ** *ҡ.* **1.** Тауышҡа, һүҙгә ҡолаҡ һалыу. *Йыр тыңлау. Радио тынлау. Иғтибар менән тыңлау. Йотлоғоп тыңлау. Тыңлар-тыңламаҫ ултырыу.* ■ *Фатима .. тояҡ тауышын алыҫҡа китеп юғалғансы тыңлап торҙо.* С. Ханов.

**2.** Эске ағзаның эшен ҡолаҡ һалып тикшереү. *Үпкәне тыңлау. Йөрәкте тыңлау.*

**3.** Берәй мәсьәләне асыҡлау йәки баһалау маҡсатында халыҡ алдында һөйләшеп тикшереү. *Эш барышы тураһында информация тыңлау.* ■ *Райсовет ултырышында отчетты тыңлағас, уҙемде бик маҡтап ташланылар.* М. Тажи. / Судҡа бәйле эште халыҡ алдында тикшереү; ҡарау. *Эште судта тыңлау. Угрылыҡ эшен тыңлау.*

**4.** Ҡушҡанды, бойорғанды үтәү. *Һүҙ тыңлау. Тыңламаған бала.* ■ *Төлкө бөтәһен дә тыңлар, ни ҡушһалар, шуны эшләр булған* (Әкиәттән). | Ыңғайға килеү, буйһоноу. *Ҡулдар ҡалтырайҙар, тыңламайҙар.* Д. Юлтый.

**5.** Үтенесте, һорауҙы үтәү. *Хәмдиә, иренең һүҙен тыңлап, уның менән сыҡты.* Һ. Дәүләтшина. *[Батша:] Эй, һалдат, бер генә йомошомдо тыңлаҫы* (Әкиәттәен).

**6.** Кеше һүҙен, кәңәшен ҡабул итеү; тотоу. *Кешене тыңламай үҙеңсә эшләү.* ■ *Тыңламаның бит һүҙемде — тип, миңә .. үпкә тотто иптәшем.* Ш. Бабич.

● *Бер олонокон, бер кесенекен тыңла Әйтем. Оло һүҙен тыңламаған, оролған да бәрелгән.* Мәҡәл.

**ТЫҢЛАУЛЫ** *с.* Ҡушҡанлы, әйткәнде ҡарышмай үтәгән. *Тыңлаулы бала.*

**ТЫҢЛАУСАН** *с. ҡар.* **тыңлаулы.**

**ТЫҢЛАУҺЫҘ** *с.* Ҡушҡанды, әйткәнде үтәмәй ҡарышыусан. *Малай бик тыңлауһыҙ, уҙ һүҙле булып үҫкән* (Әкиәттән).

**ТЫҢЛАУҺЫҘЛАНЫУ** *ҡ.* Тыңлауһыҙға әйләнеү, тыңламай башлау. *Балалары тыңлауһыҙланһа, [айыу] уларҙы сәпәкләп алыуҙан да тартынып тормай.* Н. Мусин.

**ТЫҢЛАШЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **тыңлау** 4.

**ТЫҢСЫЛ** *с. диал.* Тыңлаулы.

**ТЫҢШАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡыҫҡа муйынлы, тыңшыҡ булыу. *Һимереп, тыңшайып китеү. Ҡат-ҡат кейенеп, тыңшайып йөрөү.*

**2.** Башты баҫып, өндәшмәҫ булыу. *Тыңшайып ултырыу.*

**ТЫҢШЫҠ** *с.* **1.** Ҡыҫҡа йыуан муйынлы; тыңҡыш. *Тыңшыҡ кеше.*

**2.** Башын баҫып, өндәшмәй тороусан. *Тыңшыҡ булыу.*

● *Илдем-ялдым ике ашар, тыңшыҡ бер ашар.* Мәҡәл.

**ТЫП** *окш.* **1.** Тамсылап ниҙер тамғанда йәки аяҡ менән ҡаты итеп баҫҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Тып итеү. Тып итеп тамыу.* ■ *Өҫтәлгә тып итеп ике тамсы килеп төштө.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Эш-хәрәкәттең киҫкен рәүештә ҡапыл булғанлығын белдерә. *Тып баҫыу. Тып туҡтау. Тып итеп килеп инеү.* ■ *[Ат — егеткә:] Ошо өс ҡылдың оҙонорағын сәйнәп өҙөрһөң, мин һинең янға тып итеп килеп баҫырмын* (Әкиәттән).

**ТЫП-** *киҫ.* **Ты-** ижеге менән башланған сифатҡа йәки рәүешкә ҡушылып артыҡлыҡ дәрәжәһен бирә. *Тып-тығыҙ. Тып-тымыҡ. Тып-тыныс.* ■ *Сук тирәк яны тып-тын, бер кем дә юҡ, ти* (Әкиәттән).

**ТЫП-ТЫП, тып та тып** *окш.* Ҡабат-ҡабат тып иткән тауышты белдергән һүҙ. *Тып-тып итеү. Тып-тып атлап килеү. Тып та тып тамыу.*

**ТЫПТЫР** *окш.* Ҡаты ваҡ нәмәләр ҡапыл күпләп ҡаты ергә ҡойолғанда сыҡҡан тауышты белдергән һөҙ. *Тыптыр итеп борсаҡ ҡойолдо.*

**ТЫПТЫРЛАУ** *ҡ.* Тыптыр итеү, тыптыр-тыптыр итеү. *Япраҡтарҙағы ысыҡ тамсылары тыптырлап өҫтөмә ҡойолдо.* Д. Бүләков.

**ТЫПТЫР-ТЫПТЫР** *окш.* Ҡабат-ҡабат тып-

тыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Тыптыр-тыптыр итеү. Тыптыр-тыптыр итеп койолоу.*

**ТЫПЫЛДАТЫУ** *к.* **1.** Тып-тып иттереү, тып--тып тигән тауыш сығарыу. *Тыпылдатып бейеү.*

**2.** *күсм.* Нимәнелер бер-бер артлы күп итеп булдырғанда, алға килтереп торғанда әйтелә. *Тыпылдатып коймак бешереү.* ■ *Иртәнге сәғәттәрҙә, вағырак булһа ла, байтак кына сабак тыпылдатып алдык.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТЫПЫЛДАУ** *к.* **1.** Тып-тып итеү, тып-тып тигән тауыш сығарыу. *Ағас баштарынан тыпылдап ысык тама.* М. Тажи. *Ат тояктарының тыпылдауы тағы ла асығырак ишетелә башланы.* С. Кудаш.

**2.** Нимәләр күп булып бер-бер артлы алға килеп торғанда, әҙер булғанда әйтелә. *Балык якшы каба, алабуға ла, опто ла тыпылдап кына тора.*

**ТЫПЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **тыпылдау.** *Ер өҫтөнә кыйыктарҙан төшөп, тыпылдаша тәүге тамсылар.* Х. Ғиләжев. *Эреле-ваклы сабактар, алабуғалар .. тыпылдашып кына тора.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТЫПЫР** *окш.* Күмәк аяк тауышын белдергән һүҙ.

**ТЫПЫРЛАТЫУ** *к.* Бейегәндә тыпыр-тыпыр иттереү, тыпыр-тыпыр тигән тауыш сығарыу. *Тыпырлатып бейеү.* ■ *Бейей Ансаф .. аяктарын тыпырлатып, сапкан атты хәтерләтеп.* Н. Нәжми.

**ТЫПЫРЛАУ** *к.* Тыпыр-тыпыр итеү, тыпыр--тыпыр килеү. *Урамда тыпырлаған тояк тауышы ишетелде.* Ғ. Ғүмәр. / Аяктар менән тыпыр-тыпыр тигән тауыш сығарып бейеү. *Башкорт бейеүҙәре тап ике өлөштән тора: береһе — төп элемент, икенсеһе — тыпырлау.* К. Мәргән.

**ТЫПЫРЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **тыпырлау.** *Тыпыр-тыпыр тыпырлашып, әйләнәбеҙ беҙ бергә* (Халык йырынан).

**ТЫПЫРСЫК** *с. һөйл.* Тик тормаҫ, теремек. *Тыпырсык бала.*

**ТЫПЫРСЫНЫУ** *к. кар.* **тыбырсыныу.**

**ТЫПЫР-ТЫПЫР** *окш.* Күмәк аяк тауышын йәки аяктарҙы каты ергә йыш-йыш баҫканда, һуккылап бейегәндә сыккан тауышты белдергән һүҙ. *Тыпыр-тыпыр килеү. Тыпыр-тыпыр бейеү.* ■ *Тыпыр-тыпыр .. аттар саба күҙҙәренә күренмәйсә ак-кара.* Т. Йосопов.

**ТЫПЫРЫСТАУ** *к. диал.* Тыбырсыныу.

**ТЫПЫС** *и. диал.* Бер бөтөн икмәк.

**ТЫРАБЫЗ** *с. диал.* **1.** Еңмеш, карышмал. **2.** Сос.

**ТЫРАЖ** *и.* Караһыу йәки һарғылт төҫтәге яры канатлы бик эре һағыҙак һымак саға торған бөжәк. *Кара тыраж. Һары тыраж.* ■ *[Гөльямал:] Тыраж һағыҙак кеүек ҙур, һары .. һирәк саға. Сакһа, үлтерә саға.* Я. Хамматов.

**ТЫРАЙ:** **тырай тибеү** *диал.* эшһеҙ буш йөрөү.

**ТЫРАК** *и. диал.* Мәшәкәт, кыйынлык.

● *Юлаусының юл тырағы теймәй калмаҫ.* Мәкәл.

**ТЫРАНЛАУ** *к. диал.* Тыртанлау.

**ТЫРАНТАЙ** *и. диал.* Ябык, какса.

**ТЫРАНТАС** [*рус.* тарантас] *и. диал.* Кырандас.

**ТЫРҘАЙЫУ** *к. диал.* Тырпайыу.

**ТЫРЖЫК** [1] *с. диал.* Таржык.

**ТЫРЖЫК** [2] *и. диал.* Һуйҙан.

**ТЫРКЫЛДАУ** *к. диал.* Мыңғырлау.

**ТЫРКЫШ** [1] *и.* Вак кына тетмәкәй япраклы, кып-кыҙыл емешле, каты тарбакай һабаклы үлән; себен үлтергес.

**ТЫРКЫШ** [2] *с. диал.* Бысрак, хашшак. *Тыркыш кеше. Тыркыш булыу.*

**ТЫРКЫША** *с. диал.* Тейешенән артык куйы, нык куйы (ашка карата).

**ТЫРЛАУ** *к.* Тыр-тыр итеү. *Машина тырлай.*

**ТЫРМА** [1] *и.* **1.** Һөргән ерҙе йомшарта торған ауыл хужалығы коралы. *Ат тырмаһы. Трактор тырмаһы. Дисклы тырма. Тырма менән тырматыу.* ■ *Һабан, тырма, бесән сапкыстар .. тырым--тырағай ташлап калдырылған.* М. Тажи.

**2.** Шул корал менән ер эшкәртеү эше. *Тырмаға сығыу.* ■ *Тау битләүендәге ер иртәрәк һурыкты, тырмаға элегерәк төштөләр.* Б. Бикбай.

**3.** (*йәки* **кул тырмаһы**) Бесән йыя, түтәл йомшарта торған оҙон һаплы тешле-тешле корал. *Сүмәләгә теше һынған тырма, сук сауылға салғы һөйәлгән.* М. Хәй. *Каҙылған ерҙе .. кул тырмаһы менән тырматып сыктылар, ти* (Әкиәттән).

**ТЫРМА** [2] *и. тук.* Ике як башы тешле, ике метр самаһындағы еп оҙатыу коралы. *Епте тырмаға һалыу.* / Шул корал оҙонлоғонда итеп, буйлык епте иҫәпләү берәмеге. *Ике тырма йөн оҙаттым.*

**ТЫРМА** [3] *и. кар.* **торма.**

**ТЫРМАЛАУ** *к. кар.* **тырматыу** 2.

**ТЫРМАЛАШЫУ** *к. диал.* Тырмашыу.

**ТЫРМАЛЫУ** *к. төш. кар.* **тырмалау.** *Караһалар, ялан тултырып тары сәсәлгән, тырмалған, ти* (Әкиәттән).

**ТЫРМАСЫ** *и.* Тырма (1 мәғ.) менән ер эшкәртеүсе.

**ТЫРМАТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **тырматыу.** *Тырматылған ер.*

**ТЫРМАТЫУ** *к.* **1.** Һөргән ерҙе тырма (**1** мәғ.) менән йомшартыу. *Аркырыға тырматыу. Буйға тырматыу.*

**2.** Кул тырмаһы менән бесән йыйыу йәки ер йомшартыу. *Кубә төбөн тырматыу. Түтәлде тырматып куйыу.*

**ТЫРМАТЫШЫУ** *к. урт. кар.* **тырматыу.**

**ТЫРМАУ** *к. кар.* **тырматыу** 2.

**ТЫРМАШЫУ** *к.* **1.** Аяк-кул, бармактар менән йәбешә-йәбешә юғары үрмәләү, алға ынтылыу. *Әптер .. тырмашып, арбаға менеп ултырҙы.* Һ. Дәүләтшина. *Ат, аяғы тайып, тырмаша--тырмаша арбаны сокорҙан сығарып алып китте.* М. Тажи.

**2.** *күсм.* Бөтә көс, мөмкинлекте һалыу, тырышыу. *Кеше ниндәй генә хәлдә булһа ла, йәшәргә тырмашып ята.* Д. Юлтый.

**ТЫРМЫС** *и. иҫк.* Нык итеп бәйләнгән төйөн.

**ТЫРМЫСЛАНЫУ** *к. иҫк. төш. кар.* **тырмыслау** 1. *Тырмысланған аркан.*

**ТЫРМЫСЛАУ** *к.* **1.** Төйөнләп бәйләү; төйнәү. *Бауҙы тырмыслау.*

**2.** *күсм.* Төйөн булып өйкәү (күңелде). *Атаһының әйткән һүҙҙәре Кинйәнең күңелен туктауһыҙ тырмыслап торҙо.* Ғ. Ибраһимов.

**ТЫРНАҠ** *и.* **1.** Бармаҡ осон өҫкө яҡтан каплап үҫкән мөгөҙ матдә. *Аяҡ тырнағы. Ҡул тырнағы. Еткән тырнаҡ. Тырнаҡ ҡырҡыу. Тырнаҡ төшөү.* ■ *Һары ҡамыш кеүек ай бармағың, аҡ көмөшкә миҫал тырнағың* (Халыҡ йырынан). **Һуҡыр тырнаҡ** имгәнгән тырнаҡ.

**2.** Ҡоштарҙың һәм ҡайһы бер хайуандарҙың бармаҡ остарына кәкерәйеп үҫкән мөгөҙ матдә. *Айыу тырнағы. Бесәй тырнағы. Бөркөт тырнағы.* ■ *Ҡош тырнағы теймәгән, күк ыласын типмәгән, торомтай тигән бер ҡош бар* (Ҡобайырҙан).

**3.** *күсм.* Кеше иркен быуған рәхимһеҙ көскә ҡарата әйтелә. *Үлем тырнағынан ҡотолоу.* ■ *М. Йәлил ҡаты яраланған килеш фашистар тырнағына эләгә.* М. Сөндөклө.

**4.** Ҡайһы бер ҡорал-ҡорамалдың тырнай, һыҙыра торған киртләсле өлөшө. *Бесән йыйғыс тырнағы. Тырнаҡлы культиватор.*

**5.** Бағанаға һ. б. менеү өсөн аяҡҡа кейә торған ураҡ һымаҡ кәкре ҡорал. *Тимер тырнаҡ кейеп үргә үрләйем, имән бағананы ҡосаҡлап.* Ғ. Мәсғүт.

**6.** Тәгәрмәстең көпсәге менән туғынын тоташтырған таяҡ.

**7.** Киртләсле биҙәк; теш. *Балаҫҡа тырнаҡ һалып һуғыу.*

**8.** Тура телмәрҙе, цитаталарҙы, ҡайһы бер атамаларҙы, шулай уҡ мәғәнәләрен үҙгәртеп әйтелгән һ. б. төр һүҙҙәрҙе айырыу өсөн ҡулланылған, ҡуш өтөр рәүешендәге тыныш билдәһе. *Тырнаҡ ҡуйыу. Тырнаҡ эсенә алыу.*

♦ **Бүре тырнағы** оҙонса япраҡлы, ал төҫтәге ваҡ өйкөм сәскәле, ҡыҙыл тамырлы һыуһыл ер үләне. **Киҫеп ташлаған тырнағына ла тормай** кемдәрҙелер сағыштырғанда береһен кәмһетеп әйтелә. *[Ғибаҙула — Мәхмүзәгә:] Һин Гөлсәскәтең киҫеп ташлаған тырнағына ла тормайһың!.. Торасаҡ башың да юҡ.* Д. Исламов. **Пәйғәмбәр тырнағы** ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған оҙонса япраҡлы, һары сәскәле тырнаҡ һымаҡ кәкре орлоҡло гөл. **Тырнаҡ аҫтынан кер эҙләү** *ҡар.* **кер** [1]. **Тырнаҡ ҡараһындай** *ҡар.* **ҡара** [1]. **Тырнаҡ менән дә сиртмәү** *ҡар.* **сиртеү. Тырнаҡ осондай** *ҡар.* **ос. Тырнаҡ үлән** *ҡар.* **үлән. Шайтан тырнағы** шәбе өҫтөндәге ҡубып торған тире.

**ТЫРНАҠЛЫ** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме (әйләләргә инә).

**ТЫРНАЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **тырнау** 1, 2. *Тырналған урын.*

**ТЫРНАНЫУ** *ҡ.* Үҙ тәненде тырнау.

**ТЫРНАТЫУ** *ҡ.* **1.** *йөкм. ҡар.* **тырнау** 1, 2. *Арҡаны тырнатыу.*

**2.** Тырнаҡ менән һыҙыртыу, сыйҙыртыу. *Бесәйҙән ҡулды тырнатыу.*

**ТЫРНАУ** *ҡ.* **1.** Тырнаҡ (1, 2 мәғ.) менән ҡырыу, ышҡыу. *Башты тырнау. Елкәне тырнау.* ■ *Ғариф ҡарт эйәк аҫтын тырнап, уйланып торҙо.* Б. Бикбай.

**2.** Тырнаҡ (1 мәғ.) менән эләктереп йыртыу, тырнаҡты батырып һыҙырыу. *Тырнап ҡанатыу. Бесәй тырнаған ер.*

**3.** Аяҡ менән ерҙе тибеп соҡоу (ҡош-ҡорт, хайуандарға ҡарата). *Ерҙе тырнай-тырнай тибенеү.* ■ *[Буҙ толпар] кешнәй-кешнәй сапсаныһ, ерҙе тырнай торғас, тубығына тиклем ҡаҙып төшкән, ти.* «Алпамыша».

**4.** *күсм.* Тынғы бирмәй борсоу; өйкәү. *Һағыш йөрәкте тырнай. Эсте тырнап торған шик.*

♦ **Эс тырнап көлөү** *ҡар.* **көлөү** 1.

**ТЫРНАШЫУ** *ҡ.* **1.** *урт. ҡар.* **тырнау** 1.

**2.** *диал. ҡар.* **тырнау** 2.

**ТЫРПА**: **тырпа һырт** ташлы тау һырты; ҡыраз.

**ТЫРПАЙ** *с.* Ҡалҡып үрә торған (ҡолаҡ, сәс, һырт йөнөнә һ. б. ҡарата). *Тырпай сәс.*

**ТЫРПАЙТЫУ** *ҡ.* Үрә ҡалҡытыу. *Ҡолаҡты тырпайтыу. Һырт йөнөн тырпайтыу.* ■ *Алабуға һырт ҡанаттарын тырпайтып [суртанға] ҡаршы торған* (Әкиәттән).

**ТЫРПАЙЫУ** *ҡ.* Үрә ҡалҡыу (ҡолаҡ, сәс, һырт йөнө һ. б. ҡарата). *Тырпайған мыйыҡ. Тырпайған сәс.* ■ *Ҡара туры аттың ҡолаҡтары тырпайҙы.* Р. Ниғмәти.

**ТЫРПАЙЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **тырпайыу.** *Әүәлге һымаҡ сәстәрем тырпайышып тора. Мин уларҙы нисәмә ҡабат һыулап, артҡа ҡайырып бәйләп .. ҡарағаным бар.* Ғ. Аллаяров.

**ТЫРПАҠ** *с. ҡар.* **тырпай.** *Тырпаҡ ҡолаҡ.*

**ТЫРПЫЛДАУ** *ҡ. ҡар.* **тырпырау.**

**ТЫРПЫРАУ** *ҡ.* Бөтә тән менән һелкенеп ҡыбырлау. *Балыҡтар тырпырап ята.*

**ТЫРПЫСА** *и.* **1.** *туҡ.* Тимер үҙәккә кейҙереп әйләндерә торған еп урағыс ҡорал (киндер һуғыу эшендә ҡулланыла). *Ағас тырпыса. Түҙ тырпыса. Тырпыса сөйө.*

**2.** *диал.* Сығыр.

**ТЫРПЫСА** [2] *и. диал. ҡар.* **морондоҡ** [1] 3.

**ТЫРР** *ымл.* Атты туҡтатырға теләгәндә әйтелә.

**ТЫРҪАЙЫУ** *ҡ. ҡар.* **турһайыу.**

**ТЫРҪ-МЫРҪ, тырҫ та мырҫ** *окш.* Нимәгәлер үсегеп, үпкәләп теләр-теләмәҫ һөйләшкәндә белдергән һүҙ. *Тырҫ-мырҫ итеү. Тырҫ-мырҫ килеп йөрөү. Тырҫ та мырҫ һөйләшеү.*

**ТЫРҪ-ТЫРҪ** *окш.* Күмәк малдың ҡапыл ғына дөрр итеп ҡуҙғалып киткәнен белдергән һүҙ. *Мин өйөр айғырҙарының муйындарын дуғаландырып, тырҫ-тырҫ елеп йөрөүҙәрен ҡарап торорға ярата инем.* Н. Мусин.

**ТЫРҪЫЛДАУ** *ҡ. һөйл.* Үсегеп кирле-мирле һөйләшеү.

**ТЫРТАЙЫУ** *ҡ.* Үпкәләп үсегеү, ҡылтайыу. *Ғимадый .. үпкәсел дә түгел былай, үҙе бик тиҙ хәтере ҡалып — тыртая.* С. Ҡудаш.

♦ **Ҡартайған да тыртайған** оло кешенең үҙенә килешеп бөтмәгән эш-ҡылығына ҡарата әйтелә.

**ТЫРТАНЛАҠ** *с. һөйл.* Тейешле-тейешһеҙ һүҙгә, эшкә ҡатышҡан, ҡатышырға әҙер торған.

**ТЫРТАНЛАТЫУ** *ҡ.* Ары-бире йөрөтөү, йөрөргә ирек биреү.

**ТЫРТАНЛАУ** *ҡ.* **1.** Тыртан-тыртан килеү. *Тыртанлап атлау. Ашығып тыртанлап килеү.*

**2.** Теләһә ҡайҙа йөрөп бушҡа ваҡыт уҙғарыуға ҡарата әйтелә. *Тыртанлап йөрөү.* ■ *Анау балалар тыртанлап урамда йөрөгәнсә, исмаһам, уҡып, өйҙә ултырырҙар.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *һөйл.* Кемдер ҡыпанлап торғанда, түҙемһеҙлек күрһәткәндә әйтелә. *[Мәрйәм:] Тайфаны ебәрергә кәрәк, тыртанлап, майына сыҙаша алмай тора.* Н. Ҡәрип.

**ТЫРТАН-ТЫРТАН** *окш.* Тиҙ-тиҙ генә баҫып, шәп атларға тырышҡанды белдерә. *Тыртан-тыртан атлау. Тыртан-тыртан килеү.*

**ТЫРТ-МЫРТ, тырт та мырт** *окш. ҡар.* **тырҫ-мырҫ.** *Тырт та мырт йөрөү.*

**ТЫРТ-ТЫРТ** *окш.* Шәп-шәп кенә баҫып, юртаҡлап атлағанды белдергән һүҙ. *Тырт-тырт баҫып йөрөү.* ■ *[Йомабай] Гөлйәүһәр әбейҙәрҙең өйҙәренә ҡарай тырт-тырт йүгереп китеп тә барҙы.* Х. Кәрим.

**ТЫРТЫҠ** *с.* Нык ябыҡ, нәҙек кенә аяҡ-ҡуллы (кешегә ҡарата). *Тыртыҡ бала.*

**ТЫРТЫҠАЙ** *с. диал.* Ҡылтым.

**ТЫР-ТЫР** *окш.* Ҡалтырауыҡлы өҙөк-өҙөк тауышты белдергән һүҙ. *Тыр-тыр итеү. Тыр-тыр килеү.* ■ *Тыр-тыр трактор, һука бабай йыраҡ тор.* Д. Юлтый.

**ТЫРЫҘ** [1] *и.* **1.** Ҡапҡаслап, бау тағып, туҙҙан яһаған күнәсек һымаҡ һауыт. *Тырыҙ ҡапҡасы. Тырыҙ яһау.* ■ *Нәфисә бер тырыҙ ҡаймаҡ тотоп, ҡунаҡтарҙы күрергә килеп етте.* Н. Мусин. *Һылыу ҡыҙҙар еләк йыя тырыҙдарын әлеп беләккә* (Халыҡ йырынан).

**2.** *диал. ҡар.* **моҙға.**

**ТЫРЫҘ** [2] *с. диал.* Үҙ һүҙле, еңмеш. *Тырыҙ бала.*

**ТЫРЫЛДАТЫУ** *к.* Тыр-тыр иттереү. *[Аҙнабай] тракторын тырылдатып газ бирҙе лә минең арттан эйәрҙе.* Ф. Әсәнов.

**ТЫРЫЛДАУ** *к.* Тыр-тыр итеү, тыр-тыр килеү. *Трактор тырылдай-тырылдай юлға .. килеп етте лә тынып ҡалды.* К. Мәргән. *Сапҡыс машинаның тигеҙ ритм менән тырылдау тауышы салғы сыжлауҙарын күмеп, алыҫҡа таралды.* Ф. Лоҡманов.

**ТЫРЫМ-ТЫРАҒАЙ** *р.* Тәртипһеҙ, тарау рәүештә. *Тырым-тырағай йүгереп ҡасыу. Тырым-тырағай ултырыу. Тырым-тырағай сәселеп ятыу.* ■ *[Бибихаят:] Юҡ, тәртип юҡ беҙҙең был йортта. Бергә ултырып ашау юҡ.., һөйләшеү, кәңәшеү юҡ. Бөтәһе тырым-тырағай.* Ә. Мирзаһитов.

**-ТЫРЫП** *киҫ.* *-п* формаһындағы хәл ҡылымға ялғанып, мәғәнәне көсәйтә. *Ҡысҡырып-тырып һөйләй.*

**ТЫРЫШ** *с.* Һәр эште лә бөтә күңелен биреп ихлас эшләй торған. *Донъя көтөүгә тырыш кеше. Уҡыуға тырыш бала. Эшкә тырыш булыу.* ■ *Ҡыйын эштәр еңеләйә, булһаң тырыш.* Ш. Бабич. / Бөтә ихласлыҡты, мөмкинлекте биреп башҡарылған. *Тырыш хеҙмәт.* ■ *Фәхри күп саҡтарҙа Яҡупҡа ярҙам итә, айырыуса һуңғы ваҡыттарҙа тырыш хәстәрлек күрһәтә башланы.* Б. Бикбай.

◆ **Ҡара тырыш** 1) һис бер ҡаршылыҡҡа ҡарамай, алдына алған эште башҡарырға тырышҡан; 2) үҙ һүҙле, еңмеш.

**ТЫРЫШЛЫҠ** *и.* Эшкә булған ныҡышмалыҡ, ихласлыҡ. *Тырышлыҡ күрһәтеү. Тырышлыҡ менән алдырыу.* ■ *Тырышлығы менән гранит ташҡа ҡаҙаҡ ҡаға алыр егетте.. университет бер урынын бирмәй йөрөттө.* М. Хәй. *[Булат:] Бына Крузо .. бер үҙе йәшәһә лә тырышлығы арҡаһында астан үлмәгән.* К. Кинйәбулатова.

**ТЫРЫШМАН** *с. диал.* Тырыш.

**ТЫРЫШТЫРЫУ** *к.* **1.** Тырышырға мәжбүр итеү. *Уҡырға тырыштырыу.*

**2.** Ниҙелер булдырырға, эшләргә тырышлыҡ итеү, хәстәрлек күреү. *Тимергәленең башында яңы таҡыя, ҡаталары майланған. Быны Сәгиҙә еңгә тырыштырғандыр инде.* Һ. Дәүләтшина.

**ТЫРЫШЫЛЫУ** *к. кайт. ҡар.* **тырышыу.** *Ер йән башына тигеҙ итеп бүленде, тырышылды, сәселде. Йыл да бик яҡшы килде.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТЫРЫШЫП-ТЫРМАШЫУ** *к.* Бик ныҡ тырышыу. *Тырышып-тырмашып, барлы-юҡлы мал-тыуарҙы һатып, бер ҡолон алдыҡ.* Ш. Насыров.

**ТЫРЫШЫУ** *к.* **1.** Тырышлыҡ күрһәтеү. *Тырышып уҡыу. Тырышып эшләү.* ■ *Эй, Ғәли Рәфиҡ, өмөт бар һиндә, яҙ, эшлә, тырыш. Эшләһәң, күгең аяҙ, алдыңда яҙ.* Ш. Бабич. *Аҫыл ирҙәр тырышып йөрөр, эшләйем тип аҡыл ҡушҡаным* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ҡылымдың *-ырға* формаһына эйәреп, ниндәйҙер ынтылышты белдерә. *Барырға тырышыу. Белергә тырышыу. Китмәҫкә тырышыу.* ■ *Сәйҙел шат булырға тырышты, уйнаны, көлдө, шаярҙы.* Ғ. Сәләм.

**ТЫСҠ-ТЫСҠ** *окш. һөйл.* Ҡуйы һыулы нәмәне баҫҡылағанда, иҙгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Тыск-тыск итеү. Еүеш балсыҡ тыск-тыск килә.*

**ТЫСҠЫЛДАТЫУ** *к.* Тысҡ-тысҡ иттереү. *Тысҡылдатып ҡамыр баҫыу. Тысҡылдатып майлау.*

**ТЫСҠЫЛДАУ** *к. һөйл.* Тысҡ-тысҡ итеү, тысҡ-тысҡ килеү. *Аяҡ аҫтындағы мәте тысҡылдап ята.*

**ТЫСЫЛДАУ** *к. ҡар.* **тысҡылдау.**

**ТЫҪЫЛДАУ** *к. ҡар.* **ыҫылдау.**

**ТЫҪЫР** *с. диал.* Ярмаһы бешеп иҙелмәгән; тын. *Тыҫыр бутҡа.*

**ТЫТ-ТЫТ, тыт та тыт** *окш.* Пулемёт атыуына оҡшағаи өҙөк-өҙөк ҡаты тауышты белдергән һүҙ. *Тыт-тыт итеү. Тыт та тыт пулемёт ата.*

**ТЫТЫЛДАУ** *к.* Тыт-тыт итеү, тыт та тыт килеү. *Ҡул буйында фашистарҙың ике пулеметы туҡтауһыҙ тытылдай.* Т. Сәғитов.

**ТЫУ** [1] *и.* **1.** *кит.* Байраҡ. *Ҡыҙыл тыу. Тыу әлеү.*

**2.** *күсм.* Төп идея билдәһе. *Ирек тыуы.* ■ *Еңеү тыуын яулап алыу еңелдән булмаҫ.* М. Кәрим.

**ТЫУ** [2] *и.* Кем йәки нимәнеңдер бер бөтөндө тәшкил иткән төркөмө; туп. *Йылҡы тыуы.* ■ *Сыйырсыҡтың тыуына яғылбайҙы сөйөгөҙ.* «Урал батыр".

**ТЫУ** [3] *с.* **1.** Тоҡом килтермәгән, үрсем бирмәгән. *Тыу бейә. Тыу мал.* ■ *Ҡуҙыйкүрпәс туғыҙ йыл йөрөгән тыу бейәне һә тигәнсе тотоп ала.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** Орлоҡһоҙ, ҡыҫыр. *Тыу башаҡ. Тыу сәскә.* ■ *[Һомай:] Ҡош көйөмә ҡалырмын, тыу йомортҡа ҡалырмын.* «Урал батыр».

**3.** Сәсмәй үҫкән. *Тыу ашлыҡ. Тыу бойҙай. Тыу көнбағыш.*

**ТЫУА** [1] *и.* **1.** Бүлә йәки бүләсәрҙең улы.

**2.** Дүртенсе быуын балалар, нимәрә.

♦ **Тыуа** ят туғанлыҡ яғынан бишенсе быуынға сыҡҡан кеше.

**ТЫУА** [2] *и. иҫк.* Ауырыу, сир.

● *Эйәһеҙ мал тыуаһыҙ.* Мәҡәл.

**ТЫУАР** *и.* Мал үрсеме. *Һатырлыҡ тыуарың булмағас, алырлыҡ акса тигәне лә юҡ.* Ғ. Ибраһимов.

**ТЫУАСАҠ** *с.* Донъяла, алда буласаҡ, киләсәк. *Тыуасаҡ быуын.*

**ТЫУАСАР** *и.* Бүлә йәки бүләсәрҙең ҡыҙы.

**ТЫУҒАН** *с.* Тыуып үҫкән һәм йәшәгән. *Тыуған ауыл. Тыуған ил. Тыуған йорт. Тыуған төйәк. Тыуған тупраҡ.* ■ *Донъяла бит, әсә кеүек, тыуған ер ҙә бер генә.* А. Игебаев.

**ТЫУҒАН-ҮҪКӘН** *с. йыйн.* Тыуып үҫкән. *Тыуған-үҫкән ауыл. Тыуған-үҫкән як.*

♦ *Алтын-көмөш яуған ерҙән тыуған-үҫкән ил артыҡ.* Мәҡәл.

**ТЫУҘЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **тыуҙырыу.** *Яҡшы шарттар тыуҙырылды. Ышаныс тыуҙырылды.*

**ТЫУҘЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Донъяға килтереү; табыу. *Бала тыуҙырыу.* **Бала тыуҙырыу йорто** бала тапҡанда ҡатын-ҡыҙға медицина ярҙамы күрһәтә торған учреждение һәм шул учреждение урынлашҡан йорт.

**2.** *күсм.* Барлыҡҡа килтереү, формалаштырыу. *Салауат Юлаев һан яғынан ҙур булмаған халыҡтар тыуҙырған батырҙар араһынан иң күренеклеһе, ти Тавасиев.* В. Әхмәҙиев. / Ижад итеү, булдырыу. *Артист тыуҙырған образ. Кеше аҡылы тыуҙырған техник ҡаҙаныштар.* ■ *[Сәсәндәр тыңлаусының күңелен ауларлыҡ әҫәрҙәр тыуҙыра алғандар.* Ф. Амантай.

**3.** Ғәмәлдә бар итеү, булдырыу. *Эш шарттарын тыуҙырыу.* ■ *Мең йәһәннәм тыуҙырыр бер башҡорттоң ялҡыны; миллион ожмах яратыр бер Уралдың алтыны.* Ш. Бабич. / Берәр эш-хәлде килтереп сығарыу, уға сәбәпсе булыу. *Уңайһыҙлыҡ тыуҙырыу.* ■ *Хәбәр һалдаттар араһында паника тыуҙырҙы.* Д. Юлтый.

**4.** Берәй уй-тойғо, хис уятыу, уға сәбәпсе булыу. *Дәрт тыуҙырыу. Ышаныс тыуҙырыу.* ■ *Әйтер инең Әхмәт, кемдәр һиндә яңы хис һәм уйҙар тыуҙырҙы.* Ғ. Сәләм.

● *Батырҙы яу тыуҙыра.*

**ТЫУМА** [1] *с.* Зинанан, никахһыҙ бәйләнештән тыуған. *Тыума бала. // [Күсәкте] балалар ҙа: — һин тыума, атайың юҡ,— тип әрләгәндәр.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

● *Ахыры заман булһа, тыума батша булыр.* Мәҡәл.

**ТЫУМА** [2]: **инәнән тыума** сыр яланғас. *Тиҙҙән йылым да әҙер булды. Балыҡсылар ҙа инәнән тыума тигәндәй сисенделәр.* Р. Ғабдрахманов.

**ТЫУМА** [3]: **бер тыума** *диал.* бер туған. *Бер тыума ағай.*

**ТЫУМАСА** *и. иҫк.* Ҡан ҡәрҙәш, туған. *[Ҡарт:] Дейеү бәрейенең тыумасалары һине һәләк итергә .. ант иткән.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ТЫУМАСТАЙ** *и.* Ир балаларҙы әрләп әйтелгән һүҙ.

**ТЫУМЫШ** *и.* Тыуған ергә, сығышҡа бәйле хәл. *Тыумышы менән бөрйән.*

**ТЫУМЫШТАН** *р.* Тыуғанда уҡ, тыуғандан бирле. *Тыумыштан зәғиф. Тыумыштан телһеҙ.*

**ТЫУСА** [1] *и.* Ике йәштән өскә тиклемге һыйыр малы. *Тыусалар көтөүе.*

**ТЫУСА** [2] *и.* Ике йәше тулып, ҡыҫыр ҡалған (һыйыр, һарыҡҡа ҡарата).

**ТЫУСЫҠ** *и.* Ҡолонлаған байтал.

**ТЫУҺЫРАУ** *ҡ.* Ир затына зарығыу. *[Ҡатын:] Ағайың ире үлгән Айбикәләргә барып ингән. Уныһы тәмләп-тереп сәй эсереп ҡайтарған. Тыуһырап йөрөгән йәш бисә ни.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТЫУҺЫУ** *ҡ.* Ауырға ҡалмау (йәш ҡатынға ҡарата). *Тыуһыған ҡатын.* / Түле бөтмәгән көйө быуаҙымай йөрөү (малға ҡарата). *Тыуһыған һыйыр.*

**ТЫУЫМ** *и.* Донъяға килеү, тыуыу. *«Тыуым бар ҙа, үлем күберәк шул»,— тигән әбей.* З. Биишева.

♦ **Тыуымға килеү** тыуырға әҙерләнеү, тыуыр хәлгә килеү (ҡарындағы балаға ҡарата).

**ТЫУЫУ** *ҡ.* **1.** Донъяға килеү, донъялыҡта йәшәй башлау. *Бала тыуҙы. Ҡолон тыуҙы.* ■ *Бала тыуғас, ҡаты ҡысҡырып ала, тиҙәр, тәүге һулышты,— бәлки һәр саҡ шулай ауырҙыр башлап китеү яңы тормошто.* Н. Нәжми. *Салауат китеп, тымаҫ тимәң арыҫландай ирҙең башҡаһы* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Барлыҡҡа килеү, формалашыу. *Тыуҙы Башҡортостан, Уралында илһам уяттып.* Ғ. Рамазанов. *Хыялымда тыуҙың һин минең.* Ҡ. Даян. / Ижад һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килеү. *Шиғыр тыуҙы. Яңы әҫәр тыуҙы.* ■ *Мең томдарҙа бөтмәҫ роман тыуа, ноталарға һыймаҫ тауыштар.* Ғ. Сәләм.

**3.** *күсм.* Тормошта барлыҡҡа килеү, килеп сығыу (төрлө эш-хәлгә ҡарата). *Бәлә тыуҙы. Тауыш-ғауға тыуҙы. Китергә мөмкинлек тыуҙы. Эштә еңеллек тыуҙы.*

**4.** *күсм.* Күңелдә барлыҡҡа килеү, уяныу (хис-тойғоға ҡарата). *Ихтирам тыуҙы. Уй тыуҙы. Һорау тыуҙы. Шатлыҡ хисе тыуҙы.* ■ *[Әнүәр] үҙенең йөрәгендә .. ниндәйҙер ҡайнар бер тойғо тыуғанлығын һиҙгәйне.* Н. Асанбаев.

**5.** Күк йөҙөнә күтәрелеү, ҡалҡыу (күк есемдәренә ҡарата). *Ай тыуҙы. Ҡояш тыуҙы.* ■ *Ай таң ине, таң ине, ҡыҙарып тыуған таң ине.* Р. Ниғмәти. / Ваҡыты етеү, башланыу (ай, көн йыл миҙгелдәренә ҡарата). *Сентябрь тыуҙы. Яҙ тыуҙы. Яңы көн тыуҙы. Яңы йыл тыуҙы.*

♦ **Аша тыуған** бик шәп, бик яҡшы. *[Ҡарас батыр:] Күп батырҙарҙы осраттым, ләкин Аҡса батыр һымаҡ ирҙе күргәнем юҡ. Аша тыуған батыр икән!* (Әкиәттән). **Тыумаҫ борон ҡартайған** *ҡар.* **ҡартайыу. Уйнаштан тыуған** *ҡар.* **уйнаш. Яңы тыуғандай** (*йәки* **тыуған кеүек**) тәнгә ҙур еңеллек килгәндә әйтелә. **Яңы тыуҙыңмы** әллә ныҡ билдәле бер эш-хәлде белмәй аптырап ҡалған кешегә әйтелә.

**ТЫУЫШ** [1] *и. һөйл.* Боҙ өҫтөнә сыҡҡан һыу; шәре.

**ТЫУЫШ** [2]: **көн** (*йәки* **ҡояш) тыуышы** көн тыуған яҡ; көнсығыш. *Беребеҙ көндөң тыуышында, беребеҙ байышында* (Халыҡ йырынан).

**ТЫУЫШЛАУ** *к. һөйл.* Боҙ өҫтөнә һыу сығыу; шәре ҡалҡыу. *Йылға тыуышлаған.*

**ТЫҺЫЛДАТЫУ** *к. һөйл.* Ашыҡтырып, йыш тын алдырыу. *Тыһылдатып ҡыуыу.*

**ТЫҺЫЛДАУ** *к. һөйл.* Тынды ауыр алыу, аһылдау. *Нигмәтулла .. тыһылдай-тыһылдай алға шыуышты.* Я. Хамматов.

**ТЫШ** *и.* **1.** Нимәнелер бысраныуҙан, туҙыуҙан һаҡлау, йылылыҡ һ. б. өсөн өҫтән ябып, ҡаплап торған көп. *Буҫтау тыш. Күн тыш. Бишмәт тышы. Китап тышы. Мендәр тышы.* ■ *Сәғәттең тышы көмөш, өҫтө алтын һәм төрлө таштар менән биҙәкләнгән.* Д. Юлтый. *Аҡ ҡуянкайҙарҙан тун тектерҙем, тышкынайын ниҙән тышлайым?* (Халыҡ йырынан).

**2.** Эске яҡҡа ҡаршы яҡ, ниҙеңдер өҫтө, йөҙ яғы. *Сынаяҡтың тышы биҙәкле.* // *Тыш яҡ.* ■ *Конверт тышындағы асыҡ төшмәгән почта печатын .. сак айырып була.* Б. Бикбай. *Мейес баҙлап, тыштан ҡып-ҡыҙылға әйләнгән* (Әкиәттән). **Тыштан һалыу** әйберҙе кейем өҫтөнән сығарып һалып кейеү. *Кофтаны тыштан һалыу. Балаҡты итектең тышынан һалыу.*

**3.** Йорт, өй эсенә ҡаршы ҡуйыу рәүешендә әйтелә; асыҡ һауа, урам. *Бүлмәнән тышҡа сығыу. Тышта тороп ҡалыу. Тыштан бикләү.* // *Тыш яҡ.* ■ *Тышта ғына түгел өй эсендә лә коро нәмә ҡалмаған.* Т. Йәнәби. *Төн матур. Тыштан инге килмәй.* Б. Дим.

**4.** Ниндәйҙер сик менән билдәләнгән, айырымланған ил, ойошма, төркөмдең һ. б. икенсе яғындағы, унан ситтәге урын. *Ҡала тышындағы йорттар.* ■ *Ил сигендә дан алған, ил тышында һан алған .. сәсәнгә тиң кем булһын* (Ҡобайырҙан).

**5.** Кешенең кисерештәре сағылған йөҙө, ҡиәфәте. *Асыуҙы тышҡа сығармау.* ■ *Эсем ялҡын, тышым һалҡын, белгертәһем килмәйҙер* (Халыҡ йырынан).

**6.** *бәйл. мәғ.* Сығанаҡ килешендәге һүҙҙәрҙән һуң килеп, нимәнендер иҫәбенә инмәгәнлекте белдерә. *Норманан тыш. Пландан тыш. Кластан тыш эш. Штаттан тыш алынған хеҙмәткәр.* / Шул уҡ грамматик хәлдә кем йәки нимәненде катнашлығынан башҡа булғанды белдерә. *Ихтыярҙан тыш. Кешенең теләгенән тыш.*

◆ **Ғәҙәттән (йәки сиктән) тыш** бик, сикһеҙ. *Ғәҙәттән тыш ауыр. Сиктән тыш күп. Сиктән тыш үҫал.* **Күҙ тышта ҡалыу** *ҡар.* **күҙ. Тышҡа сығыу** ярау итеү өсөн сығыу. **Эсендәге тышында** *ҡар.* **эс.**

● *Боронғолар һүҙе китаптан тыш түгел.* Мәҡәл. *Майлы сүлмәк тышынан билдәле.* Мәҡәл.

**ТЫШАЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **тышау** [1]. *Тышалған ат.*

**ТЫШАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **тышау** [1]. *Атты тышатыу.*

**ТЫШАУ** [1] *к.* Ситкә китмәһен өсөн малдың ике алғы аяғын ара ҡалдырып, ҡуша бәйләү. *[Юлсы] үләндең иң яҡшы еренә алып барып, билгауы менән атын тышаны.* И. Көҫәпҡол.

**ТЫШАУ** [2] *и.* Малды тышай торған бау. *Ҡайыш тышау. Сүс тышау. Ҡыҫҡа тышау.* ■ *Ат .. аяғындағы тышауҙарын, башындағы йүгәндәрен өҙгөләп бөттө, ти* (Әкиәттән). **Тышау һалыу** аттың аяғын тышаулау.

**ТЫШАУЛАУ** *к.* Аттың аяҡтарын тышау менән бәйләү.

**ТЫШАУЛЫ** *с.* Аяғына тышау һалынған, тышауланған. *Тышаулы мал. Тышаулы ат.*

**ТЫШҠАРЫ** *р. диал.* Эстән тышҡа табан.

**ТЫШҠЫ** *с.* **1.** Өҫтән ҡаплап торған, көпләгән; өҫкө. *Тышҡы кейем. Тышҡы ҡабыҡ.*

**2.** Нәмәнең өҫкө йөҙөнә мөнәсәбәтле. *Тышҡы үҙгәреш. Тышҡы матурлыҡ.* ■ *Кеше үҙенең тәбиғәте менән бик ҡатмарлы, уның тышҡы күренешенән тыш эске доньяһы бар.* М. Тажи.

**3.** Йорттоң, өйҙөң тыш яғындағы, урам яҡтағы. *Өйҙө тышҡы яҡтан һылау.* ■ *[Ғамир] тышҡы утлыҡсаларға һарай башынан бесән ауҙарҙы.* Б. Бикбай.

**4.** Сит ил менән аралашыуға бәйле. *Тышҡы баҙар. Тышҡы сауҙа.*

**ТЫШЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **тышлау.** *Тышланған китап.* ■ *Рөстәм .. ҡыҙыл ебәк менән тышланған бик матур блокнот алды.* Ә. Вәли.

**ТЫШЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **тышлау.** *Түнде тышлатыу.*

**ТЫШЛАУ** *к.* Тыш ҡуйыу, тышлыҡ кейҙереү. *Дәфтәр тышлау. Тышлаған толоп.* ■ *Иптәштәре килгәндә Булат китап тышлап маташа ине.* З. Хисмәтуллин.

**ТЫШЛЫ** *с.* Тыш менән көпләнгән, тышлығы булған. *Буҫтау тышлы толоп. Күн тышлы китап.* ■ *Әсле лә тышлы бәрән тун, әсәйемә бүлһын минән һуң* (Сеңләүҙән).

**ТЫШЛЫҠ** *и.* Ниҙелер тышлауға, көпләүгә тәғәйенләнгән нәмә. *Китап тышлығы. Тун тышлығы.* // *Тышлыҡ тауар.* ■ *[Мендәрҙәргә] бирәр ҡат тышлыҡ алһаңсы.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТЫШҺЫҘ** *с.* Тыш менән көпләнмәгән, тышлығы булмаған. *Тышһыҙ бүрек. Тышһыҙ мендәр.*

**ТЫШЫЛДАУ** *к.* Тынды ауыр алыу; тыһылдау. *Тышылдап сак атлау. Тышылдығы сығыу.*

**ТӘ** [1] *терк. ҡар.* **та** [1].

**ТӘ** [2] *киҫ. ҡар.* **та** [2].

**ТӘБДИЛ** *и. иҫк. ҡар.* **тәбәддел.**

**ТӘБЕЙӘ** *и. һөйл.* Һөткә туҡып ҡурған йомортҡа.

**ТӘБЕНГЕ** *и.* Ҡайһы бер ағастарҙың ҡабығынан һарҡҡан ҡуйы һут (елем сифатында ҡулланыла).

**ТӘБЕР** *и.* **1.** Тирмәнең төнлөгөн яба торған кейеҙ.

**2.** *диал.* Әрһеҙгә тотолған кейеҙ.

**ТӘБИҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Китап баҫыусы. □ **Тәбиғ ҡылыу** матбуғатта баҫып сығарыу.

**ТӘБИҒИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Булмышы, сығышы менән тәбиғәткә бәйле, кеше тарафынан эшләнмәгән; яһалма түгел. *Тәбиғи шарттар. Тәбиғи аҙыҡ. Тәбиғи газ. Тәбиғи көтөүлек. Урман — тәбиғи байлыҡ.* ■ *[Урманцева:] Йәшен йәшнәү, күк күкрәү, ямғыр яуыу кеүек тәбиғи хәдисәләр һеҙгә билдәле.* С. Агиш. / Кешенең үҙ тәбиғәтенә бәйле, тыумыштан булған. *Тәбиғи матурлыҡ.* ■ *Ул тәбиғи бер матур, биҙәмәйсә ҡаш, керпеген.* М. Сабит.

**2.** Өйрәнелгән даими тормошҡа бәйле; ғәҙәттәге, ғәҙәти. *Тәбиғи хәл. Тәбиғи эш.* ■ *Тәүге мәл-*

*дәрҙә байрамса йәшәү миңә тәбиғи булып тойолдо.* Ф. Иҫәнғолов. *Ул бик тәбиғи рәүештә тормоштоң .. үҙәгендә ҡайнап үҫте.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *инш.* Эш-хәлдең бәхәсһеҙ, асыҡ булғанын белдергәндә әйтелә; билдәле. *Тәбиғи, ул [Зәки] .. Ерәнсәйҙең яҙмышы менән дә ҡыҙыҡһына ине.* С. Агиш.

**ТӘБИҒӘТ** *и.* **1.** Кешене уратып алған материаль донъя, ер йөҙөндәге кеше эшмәкәрлегенән тыш булған бөтә төр нәмә һәм күренеш. *Тәбиғәт донъяһы. Тәбиғәт закондары.* ■ *Ул [һөнәрсе] хәҙер теләгәнсә тауҙар, далалар гиҙә, тәбиғәттең яңынан-яңы серҙәрен өйрәнә.* З. Биишева. *Эй, тәбиғәт, һинең һымаҡ көслө түгел бер кем ҡулы.* Р. Янбулатова. **Тәбиғәт белеме** тәбиғәт күренештәрен өйрәнә торған фән.

**2.** Үҙенә айырым үҙенсәлектәре булған билдәле бер урын һәм шул урынға хас климат, ер-һыу шарттары, хайуан һәм үҫемлектәр донъяһы. *Ҡышҡы тәбиғәт. Урал тәбиғәте.* ■ *Ғашиҡ булып гүзәл тәбиғәткә баҫып торам Иҙел ярында. Аҡ ҡайындар, ғорур ҡарағайҙар теҙелгәндәр минең алдыма.* Т. Ҡарамышева. **Тәбиғәт ҡосағында** урман, ер-һыу, йәшеллек солғанышында, тәбиғәт эсендә. **Тәбиғәт балаһы** ҡала культураһы шауҡымына бирелмәгән, тәбиғәт ҡосағында йәшәгән кеше.

**3.** Кешенең булмышына хас, тыумыштан килгән сифаттар. *Тәбиғәте менән ауыр кеше. Йомшаҡ тәбиғәтле кеше. Ҡаты тәбиғәтле. Ҡырыҫ тәбиғәтле.* ■ *Зөһрә лә, Ғәлиә кеүек, мәҙрәсәгә барып уҡыһа, шикһеҙ, тәбиғәте боҙолор, холҡо үҙгәрер ине.* М. Ғафури.

**ТӘБИКМӘК** *и.* **1.** Тары ононан әсетеп бешергән ҡоймаҡ. *[Мәрхәбә:] Тары ононан тәбикмәк бешереп килтерҙем киленгә.* Б. Бикбай.

**ТӘБЛИҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Еткерелгән, тапшырылған хәбәр. *Барса әшйә .. бер тәблиғ булыуын көтә.* М. Ғафури.

□ **Тәблиғ итеү** (*йәки* **ҡылыу, әйләү**) хәбәр итеү, әйтеү. *Күптән-күп, сукҭан-сук сәләмемде ирсал вә тәблиғ әйләнем.* Х. Ибраһимов.

**ТӘБРИК** [*ғәр.*] *и.* Ҡотлау һүҙе. *Мин юбилейға .. махсус тәбрик шиғыры яҙып ебәрҙем.* М. Ғафури.

□ **Тәбрик итеү** ҡотлау. *Ҡул сабыуҙар яңғырап китәләр .. Был бит беҙҙе тәбрик итәләр.* Х. Ҡунаҡбай.

**ТӘБРИКЛӘҮ** *к. юғары* Ҡыуаныслы ваҡиға уңайы менән ҡотлау, тәбрик итеү. *Шундай тынлыҡ. Бары бер өн генә тәбрикләнә июль иртәһен.* М. Кәрим.

**ТӘБӘ** . *диал.* Тәбейә.

**ТӘБӘҒӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Билдәлә бер дәүләт граждандары, дәүләт ҡул аҫтындағы халыҡ. *[Болгар кенәздәре] башҡорттарға үҙҙәренең тәбәғәһе тип ҡарап.., яһаҡ түләтәләр ине.* Ғ. Фәхретдинов.

**ТӘБӘҒӘЛЕК** *и. иҫк.* Гражданлыҡ. *Россия тәбәғәлеге.*

**ТӘБӘДДӨЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Үҙгәреш. *Өфөлә артыҡ тәбәддөл юҡ.* М. Ғафури.

**ТӘБӘЛДЕРЕК** *и. кар.* **табалдырыҡ.**

**ТӘБӘН** *и. диал.* Энәлек, дунала.

**ТӘБӘНӘК** *с.* **1.** Ҡыҫҡа, йыуантыҡ буйлы (кешегә ҡарата).

**2.** *диал.* Тәпәшәк. *Тәбәнәк йорт.*

**ТӘБӘРРЕК** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Хөрмәтле, ғәзиз. *Ҡайныһы хайуан көйө ғамдар ҡашында шәп була, һай ҡәҙерле, һай ғилем, һай-һай тәбәррек зат була.* Ш. Бабич.

**ТӘБӘРӘК** [*ғәр.*] *и. дини* Кешене ерләгәндә фатиха биреү рәүешендә уҡыла торған доға. *Күмеү эше тамам булды. Хәҙрәт бик моңло итеп тәбәрәк сүрәһен уҡыны.* М. Ғафури.

**ТӘБӘССЕМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Йылмайған, көлөмһөрәгән төҫ. *Мин тәбәссем берлә ҡарайым ҡанлы йәштәр арҡылы.* Я. Юмаев.

**ТӘГӘРЛЕК** *и.* Башында оҙон ҡара ҡауырһын супайы булған, һырты менән түше йәшкелт һаҙ ҡошо. *Ҡубәләктәй леп-леп итеп уйнап оса тәгәрлек.* С. Ҡулибай.

**ТӘГӘРЛӘТЕҮ** *к. кар.* **тәгәрәтеү.** *Уйнай балалар ҡар тәгәрләтеп.* Х. Ғәбитов.

**ТӘГӘРЛӘҮ** *к. кар.* **тәгәрәү** 1, 2. *Арба тәгәрләй. Вагон тәгәрләй. Тәгәрләп китеү. Тәгәрләп төшөү.* ■ *Ялбыр ҡаш аҫтынан тәгәрләп сыҡҡан .. ике бөртөк йәш ергә ағып төшә.* З. Биишева.

**ТӘГӘРЛӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **тәгәрләү.** *Теҙелеп ятҡан йомортҡалар тәгәрләшеп иҙәнгә төштө.* Ғ. Ғүмәр.

**ТӘГӘРМӘЛӘҮ** *к. диал.* Тәгәрләү.

**ТӘГӘРМӘС** *и.* **1.** Арба, автомобиль, вагон һ. б. нәмәләрҙе тәгәрәтеп хәрәкәткә килтереү өсөн уларҙың күсәренә кейҙерелгән көпсәкле түңәрәк ҡулайлама. *Алғы тәгәрмәс. Вагон тәгәрмәсе. Велосипед тәгәрмәсе. Тәгәрмәс көпсәге. Тәгәрмәс тулыны. Тәгәрмәс юлы.* ■ *Хафиз ҡарт арба тәгәрмәстәрен майлап, атын екте.* М. Тажи.

**2.** Төрлө механизмдарҙы әйләндереп хәрәкәткә килтерә торған түңәрәк ҡулайлама. *Тешле тәгәрмәс. Маховик тәгәрмәсе.*

**3.** *диал.* Балалар арбаһы.

**4.** *диал.* Сыҙыр.

**ТӘГӘРМӘСЛЕ** *с.* Тәгәрмәс ярҙамында хәрәкәт иткән, тәгәрмәскә ултыртылған. *Тәгәрмәсле трактор.*

**ТӘГӘРМӘСЛӘНДЕРЕҮ** *к. һөйл.* Тәгәрмәс һымаҡ итеү. *[Емеш] пальтоһының оҙон киң еңдәрән тәгәрмәсләндереп төрөп ҡуйған.* З. Биишева.

**ТӘГӘРМӘСЛӘНЕҮ** *к. һөйл.* Тәгәрмәс кеүек түңәрәк хәлгә килеү, түңәрәк булыу.

**ТӘГӘРМӘСЛӘҮ** *к.* Тәгәрмәс кеүек түңәрәк итеү. *[Зиләнәң] ҡулында тәгәрмәсләп уралған бик оҙон бау.* Р. Ғабдрахманов.

**ТӘГӘРСӘК** *и.* Бәләкәй генә тәгәрмәс.

**ТӘГӘРӘТЕҮ** *к.* **1.** Түңәрәк, йомро нәмәне әйләндереп хәрәкәт иттереү. *Туп тәгәрәтәп уйнау. Тәгәрмәсте тәгәрәтеү.* / Тәгәрмәс ярҙамында хәрәкәт иттереү. *Арбаны тәгәрәтеп алып барыу.*

**2.** Аяҡтан йығыу, ҡолатыу. *Тәгәрәтә һуғыу.*

**ТӘГӘРӘҮ** *к.* **1.** Үҙ күсәре тирәһендә әйләнә-әйләнә билдәле бер йүнәлештә хәрәкәт итеү, тәгәрләү (түңәрәк, йомро нәмәләргә ҡарата). *Туп тәгәрәп бара. Тәгәрмәс тәгәрәй.* ■ *Бер генә бөртөк ярма ҡыҙҙың аяғы аҫтына тәгәрәп кереп, һаҡланып ҡалған, ти* (Әкиәттән). / Һарҡыуҙан

түбәнгә табан әйләнә-әйләнә китеү. *Таш тау аҫтына тәгәрәне.* ■ *Әлтәф бөгәрләнеп аҫка осто, тәгәрәгән терпе шикелле.* Т. Арслан. / Тәгәрмәс ярҙамында хәрәкәт итеү, барыу (транспорт сараларына ҡарата). *Йөк күтәргән арба тыгыр-тыгыр алга тәгәрәй.* Т. Хәйбуллин. / *күсм.* Башҡарылышы, үтәләше тотҡарлыҡһыҙ булыу. *Донъя тәгәрәп бара. Эштәр алга тәгәрәй.* ■*[Ярцев:] Өсөнсө вахтага тагы берәй теремегерәк егет табып ҡуйһагыҙ, эшегеҙ тәгәрәп кенә барыр.* К. Мәргән.

**2.** Тамсы-тамсы булып ағып төшөү, тәгәрләү (тир, күҙ йәшенә ҡарата). *Маңлайҙан борсак-борсак тир тәгәрәй.* ■ *Әбейҙең күҙенән эре-эре ике бөртөк йәш тамсыһы бите буйлап тәгәрәне.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Аяҡтан ауыу; ҡолау, йығылыу. *Тәгәрәп китеү. Тәгәрәп калыу. Тәгәрәп төшөү.* ■ *Хәмдиә сүмәксеп барып, карга тәгәрәне.* Һ. Дәүләтшина. *Йомшак тупракта ат томоролоп-томоролоп бер-ике талпына ла, һөрлөгөп тәгәрәй.* Т. Килмөхәмәтов.

**4.** *р. мәг. күсм.* Хәл ҡылымдың *-п* формаһында ҡылымдар алдынан килеп «бик нык, күп» тигән мәғәнәне белдерә. *Тәгәрәп илау. Тәгәрәп көлөү.* ■ *Был ерҙә .. карбуз үҫкән тәгәрәп.* Ғ. Ғүмәр.

**ТӘГӘРӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **тәгәрәү** 2—4. *Тәгәрәшеп ятыу.* ■ *Йорт тултырып себейҙәр тәгәрәшеп йөрөйҙәр, бөтәһе лә тип-тигеҙ.* Ш. Мәхмутов.

**ТӘГӘС** *и.* **1.** Алдырҙан бәләкәй аш һауыты; туҫтак. *Ҙур тәгәс. Агас тәгәс. Тимер тәгәс.* ■ *Аяксыларҙың береһе тәгәскә кымыҙ койоп, иң тәүҙә тирмә хужаһы Аллаяр алдына ҡуйҙы.* Ш. Шәһәр.

**2.** *диал.* Сынаяҡ өҫтө.

**3.** *диал. кар.* **алап** [1] 1. *Кабык тәгәс. Туҙ тәгәс.*

**4.** *диал. кар.* **шүмән** [1] 1.

**ТӘҒБИР** [*гәр.*] *и.* **1.** Ниндәйҙер эске мәғәнәһе булған һүҙ, фраза. *Көлкө тәгбирҙәр сыгарып һөйләй инем.* С. Агиш.

**2.** Төш юрауы, төштө аңлатыу. *[Сабир мулла:] Мәхәлләм халкым гаугалаша, талаша кеүек. .. Төш тәгбиремә килтереп караганда, михрабым өсөн талашалармы икән, тип хафаланам.* Б. Ишемғол.

□ **Тәғбир итеү** (*йәки* **ҡылыу**) әйтеү, аңлатыу. *Баланы әҙләп таба алманылар .. Ахырҙа, йыртҡыс һәләк иткәндер, тип тәгбир кылдылар ҙа ҡуйҙылар.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ТӘҒБИРНАМӘ** [*гәр.* ⟨ *фарс.*] *и. иҫк.* Төш юрағыс.

**ТӘҒЗИМ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Хөрмәт. *Тәгзим менән каршы алыу.* ■ *Маңлайҙарын ергә тейҙереп, тәгзим күрһәттеләр.* Ғ. Ибраһимов.

□ **Тәғзим итеү** (*йәки* **ҡылыу**) хөрмәтләү, ололау. *Тәгзим кылып сәләм биреү.* ■ *Бер йәш егет иилеп туктаны. Туктаны ла атанан төшөп, ханды тәгзим кылды.* Ә. Таңғатаров.

**ТӘҒЗИМЛӘҮ** *к. иҫк.* Хөрмәтләү, ололау.

**ТӘҒЗИР** [*гәр.*] *и. иҫк.* Суд ҡарары; хөкөм. *Ғәскәри бай: «Бына кылыс — һеҙгә, баш — минән, сабыгыҙ»,— тип, тәгзир менән килде* (Әкиәттән).

**ТӘҒЗИӘ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Кемдеңдер үлеүенә ҡарата белдерелгән ҡайғы; матәм. *Тәгзиә белдереү.* ■ *Үлгәнемде уйлам ҡайгырамын, күҙ йәш менән якып тәгзиә.* М. Ғафури.

□ **Тәғзиә ҡылыу** ҡайғы уртаҡлашыу.

**ТӘҒКИП** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Кемдеңдер эҙәрлекләүе, күҙәтеүе.

□ **Тәғкип итеү** эҙәрлекләү, күҙәтеү. *1912 йылды кемдәрҙеңдер доносы буйынса мине тәгкип итеү башланды.* М. Ғафури.

**ТӘҒЛИМ** [*гәр.*] *и. кит.* **1.** Уҡытыуға, белем биреүгә бәйле эш. *Тәглим мәсьәләһе.*

**2.** Белем, ғилем. *Йәшлек вакыты, тугандар, бик кәҙерле; әҙәп тәглим ал, булам тиһәң һөнәрле.* С. Яҡшығолов. **Ибтидаи тәғлим** *иҫк.* башланғыс белем. **Тәғлим ғөмүми** *иҫк.* дөйөм белем.

□ **Тәғлим итеү** уҡытыу, өйрәтеү. *Итәм тәглим шул йортта шул ауылдың балаларын кыш буйы.* Ш. Тулвинский.

**ТӘҒЛИМӘТ** [*гәр.*] *и.* **1.** Фәнни мәғлүмәт йыйымы, ғилми фекер. *Ленин тәглимәте.* ■ *Һәр тәглимәт үҙгәрергә тейеш, үҙгәрмәһә, ул бит йәшәмәй.* Р. Ғарипов.

**2.** Рәсми күрһәтмә; директива. *Урман үрсетеү тейешлеге тураһындагы тәглимәт бирелде.* Ғ. Ғисмәти.

**ТӘҒМИР** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Нимәнендер эш ителеүе, төҙөлөүе.

**2.** Боҙолған нәмәнәң төҙәтелеүе, яңыртылыуы.

□ **Тәғмир итеү** (*йәки* **ҡылыу**) 1) эшләү, башҡарыу. *Ер эшен тәгмир итәр өсөн төрлө-төрлө машина, складтары һалынмыш һәр бер урам башына.* С. Яҡшығолов; 2) төҙәтеү, яҡшыртыу.

**ТӘҒРИЗ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Һүҙҙең кинәйәләп, ситләтеп әйтелеүе; ситләтеп әйтелгән һүҙ. *Ул [Ғабдулла] бөйөк уй, нескә хис, тәгриздәргә бик бай, тимен.* Ш. Бабич.

**ТӘҒРИФ** [*гәр.*] *и. кит.* **1.** *иҫк.* Эш-хәлдең, күренештең аңлатып бирелеше. *Һеҙҙе күргәс, шул кәҙәр шатландык, тәгриф мөмкин түгел.* М. Фәйзи.

**2.** Аңлатма, төшөнсә. *Алмашка тәгрифте функциональ үҙенсәлегенән сыгып бирәбеҙ.* Н. Ишбулатов.

□ **Тәғриф итеү** (*йәки* **ҡылыу**) аңлатып биреү, таныштырыу. *Байрамбикә .. уны [Кормошто] зарарһыҙ кеше тип тәгриф кылгайны.* Ш. Шәһәр.

**ТӘҒРИФЛӘҮ** *к. иҫк.* Аңлатыу, тәғриф итеү.

**ТӘҒӘЙЕН** [*гәр.*] *с.* **1.** Кем йәки нимәләр өсөн төбәп билдәләнгән, алдан билдәләп ҡуйылған. *Тәгәйен урын. Тәгәйен эш. Тәгәйен булыу.* ■ *Аш бешерә, тәгәйен генә хужаһы булмаган кунәктәр аласыкта хәҙер икәү.* Ф. Иҫәнғолов

**2.** *р. мәг.* Билдәле, асыҡ. *Тәгәйен генә белмәйем.* ■ *[Тайып:] Үҙ күҙем менән күрҙем, тәгәйен Шабан ине.* Н. Ҡәрип.

□ **Тәғәйен итеү** (*йәки* **ҡылыу**) төбәп билдәләү, алдан билдәләү. *Минең кайһы хәлфәнән укыуымды хәҙрәт үҙе тәгәйен итергә тейеш булганга күрә, уның килгәнен көтә инем.* М. Ғафури.

**ТӘҒӘЙЕНЛЕ** *с.* Төбәп ҡуйылған, билдәләнгән, тәғәйенләнгән. *Тәгәйенле мал. Эшкә тәгәйенле кеше.*

**ТӘҒӘЙЕНЛӘМӘ** *и.* Ҡайҙа йәки нимәгәләр төбәп ебәргәнде күрһәткән яҙыу, документ. *[Вәлиулла Стәрлетамакка] эшкә тәгәйенләмә*

*алырға, шул ыңғайҙан етәкселәр менән көрәшеп танышырға .. тип килә.* Ф. Исәнғолов.

**ТӘҒӘЙЕНЛӘНЕҮ** *к. төш. ҡар.* тәғәйенләү. *Тәғәйенләнгән көшө. Тәғәйенләнгән ваҡыт.* ■ *Таң атыуға тәғәйенләнгән ергә барып еттек.* Ғ. Аллаяров. *[Сергей:] Донъяға кеше тыуһа, минеңсә, уға тәғәйенләнеп икенсе бөрәү ҙә тыуа. Тик уны нисек осратырға?* А. Абдуллин.

**ТӘҒӘЙЕНЛӘҮ** *к.* **1.** Билдәле бер эшкә, урынға төбәп билдәләү, тәғәйен итеү. *Эшкә тәғәйенләү. Бригадир итеп тәғәйенләү.* ■ *[Ишбулатов:] Һәр бригаданан баҫыуҙарға кешеләр тәғәйенләргә тейешлебеҙ.* Ә. Вәли.

**2.** Кем йәки нимәлер өсөн алдан билдәләү, атап ҡуйыу. *Эшселәргә эш хаҡы тәғәйенләү. Бесән ташырға машина тәғәйенләү.* ■ *[Баярҡыҙға] бер эйәрле ат та тәғәйенләп ҡуйған.* М. Тажи.

**3.** Урынын, ваҡытын алдан билдәләү, күрһәтеү. *Эш урынын тәғәйенләү. Осрашыу урынының тәғәйенләү.* ■ *Тәғәйенләгән сәғәткә ҡайтманығыҙ.* С. Ҡудаш.

**ТӘҒӘЙЕР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Үҙгәреш. *Тәғәйер әхүәл.*

**ТӘҒӘЛАЛЛА** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Аллаһы тәғәлә. *Зиһенемде рәүшан әйләп, бәхетле ҡыл тәғәлалла* (Мөнәжәттән).

**ТӘҒӘЛЛӨК** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Бәйләнеш.

**ТӘҒӘЛЛӨКЛӨ** *с. иҫк. кит.* Бәйләнешле, бәйле. *Ҡулға төшкөн хәбәрҙең күбеһе яңғыҙ-яңғыҙ һуғышҡан полктарға ғына .. тәғәллөклө.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**ТӘҒӘЛӘ** [*ғәр.*] *с.* Бөйөк (алланы ололау һүҙе). *Аллаһы тәғәлә. Хоҙай тәғәлә. Хаҡ тәғәлә.*

**ТӘҒӘМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Аҙыҡ, ашамлыҡ. *Тәғәм ҡабыу.* ■ *Ҡырҡ йыл эшләнем, бер ҡабым хәрәм тәғәм еймәнем, кеше хаҡына теймәнем.* Ш. Шәһәр.

**2.** *с. мәғ.* Бер ҡабырлыҡ, бер ҡабым (аҙыҡҡа ҡарата). *Тәғәм ризыҡ* ■ *Марина .. үҙенең дә бөгөн иртәнән бирле тәғәм дә ризыҡ алмаған булыуын иҫенә төшөрҙө.* М. Хәйҙәров.

□ **Тәғәм итеү** ашау.

**ТӘҒӘНӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Хурлыҡ, оят. *Тәғәнә күреү.* ■ *Балам, ялҡау булыуҙарың ата-әсәңә тәғәнә* (Халыҡ йырынан).

**ТӘҒӘНӘЛЕ** *с. иҫк.* Шикле, шик тыуҙырған. *Суфый алан-йолан ҡарана .. Бик тәғәнәле кеүек.* Ғ. Ибраһимов.

**ТӘҒӘНӘҺЕҘ** *с. иҫк.* Шикһеҙ.

**ТӘҒӘССӨБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Нимәгәлер аңһыҙ рәүештә мөкиббән бирелгәнлек; фанатизм. *Дини тәғәссөб.* ■ *«Илаһи, был тәғәссөб һөрөмөнән касан котолорбоҙ икән беҙ»,— ти Сәғит.* Ғ. Ғүмәр.

**ТӘДБИР** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Билдәле бер маҡсатта башҡарылған эш; сара. *Тәдбир күреү.* ■ *[Богданов:] Фронтта ни барын, ваҡытлы хөкүмәттең тәдбирҙәрен .. асыҡ итеп һөйләп бирмәй булмай.* И. Насыри.

□ **Тәдбир итеү** (*йәки* **ҡылыу**) тейешле эште эшләү, башҡарыу. *Конторҙа низам буйынса тейешле тәдбирҙәрҙе ҡылғас, [Ғәлимгә] төрмә кейемдәре кейҙерә башланылар.* К. Туйкин.

**ТӘДРИЖ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Нимәнеңдер үҫеш кисереүе, алға барыуы; эволюция.

**ТӘДӘННИ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ниҙеңдер үҫеш кисермәй туҡталып ҡалыуы йәки түбән төшөүе. *Донъяла һәр милләттең әхүәлдәре алмашыныр, ғаһ ваҡыт итеп тәрәкки, ғаһ тәдәнниҙә улыр.* С. Яҡшығолов.

**ТӘҘРӘ** *и.* Яҡтылыҡ төшһөн, һауа инһен өсөн ҡоролма стенаһына эшләнгән уйым һәм шул уйымға ҡуйылған рамлы быяла. *Асмалы тәҙрә. Вагон тәҙрәһе. Тәҙрә башы. Тәҙрә быялаһы. Тәҙрә төбө. Тәҙрә уйыу.* ■ *Урам яҡ тәҙрә ҡапҡастары ябыҡ булғанлыҡтан, өй эсе ҡараңғы ғына ине.* Д. Исламов.

**ТӘЖАУЫЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Сикте үтеп баҫып инеү, һөжүм. *Пётр Беренсе .. Ҡазандан башҡорттарға ҡаршы тәжауыз башлатты.* Ғ. Фәхретдинов.

□ **Тәжауыз итеү** (*йәки* **ҡылыу**) баҫып инеү, һөжүм итеү.

**ТӘЖЕ** *и. ҡар.* тәҙе.

**ТӘЖЕМ** *и. ҡар.* тәғзим.

**ТӘЖРИБӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Тормошта, эштә үҙләштерелгән белем һәм күнекмәләр йыйылмаһы. *Алдынғы тәжрибә. Бай тәжрибә. Эш тәжрибәһе. Тәжрибә уртаҡлашыу. Тәжрибә туплау.* ■ *Айбулат .. үҙенә тәжрибә яғынан [Петровтың] ҙур иптәш икәнен әйтте.* Һ. Дәүләтшина. *[Казаков:] Килер ваҡыт.., һәр урынға белеме менән дә, тәжрибәһе менән дә яраҡлы һәр эштең үҙ инженерҙары табылыр.* С. Агиш.

**2.** *филос.* Кешенең тышҡы тәбиғәт менән бәйләнешкә инеү, аралашыу нигеҙендә тупланған һәм материаль донъяны аңлап белеүгә сығанаҡ булған практик аңы, үҙ кисерештәре йыйылмаһы.

**3.** Берәй төрлө күренеште тикшереү һәм өйрәнеү өсөн билдәле бер шарттарҙа үткәрелгән һынау. *Химик тәжрибә. Тәжрибә яһау. Тәжрибә үткәреү.*

**ТӘЖРИБӘЛЕ** *с.* Берәй эш өлкәһендә тәжрибәһе, эш күнекмәһе күп булған. *Тәжрибәле уҡытыусы. Тәжрибәле доктор.* ■ *Ҡадир.., күрәһең, аҙ тәжрибәле трактористарға ышанып етмәгәндер, МТС машиналарын үҙе килтерешә.* Б. Бикбай. / Тормош тәжрибәһе ҙур булған, күпте күргән. *Тәжрибәле оло кеше.* ■ *Тәжрибәле карттар: «Балалар быйыл иген уңа»,— тип алдан хәбәр итә ине.* Т. Йәнәби.

**ТӘЖРИБӘЛЕЛЕК** *и.* Тәжрибәле булыу сифаты.

**ТӘЖРИБӘҺЕҘ** *с.* Тәжрибәһе аҙ булған, эш күнекмәһе етерлек булмаған. *Тәжрибәһеҙ һатыусы. Тәжрибәһеҙ токарь.* ■ *Ишбулдин тәжрибәһеҙ кеше түгел .. Партия ойошмаһы секретарын бер ҙә юҡҡа ғына райкомға саҡырмауҙарын яҡшы аңлай ине.* Ә. Вәли. / Тормош тәжрибәһе булмаған, йәш. *Тәжрибәһеҙ ҡыҙ бала. Тәжрибәһеҙ йәш быуын.*

**ТӘЖРИБӘҺЕҘЛЕК** *и.* Тәжрибә (1 мәғ.) етмәгәнлек. *Беҙ аңралар Женя менән Ирочкаdebug фамилияларын һорарға онотҡанбыҙ .. Был беҙ-ҙең йәшлектән, тәжрибәһеҙлектән инде.* Д. Юлтый.

**ТӘЖҮИТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡөрьәнде дөрөҫ уҡыу ҡағиҙәһе. *Тәжуит үҙе айырым дәрес булып керә торғайны.* Ғ. Ғүмәр.

**ТӘЖҺИЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Мәйетте күмергә әҙерләү эше.

**ТӘЖӘССЕМ: тәжәссем итеү** *иҫк. кит.* кәүҙәләндереү, билдәле бер ҡиәфәттә күҙ алдына килтереү.

**ТӘЗВИЖ** *и. иҫк. кар.* **тәзәүүеж.**

**ТӘЗЕ** [*рус.* тяж] *и.* Тәртәне тарттырып, алғы күсәр башына эләктергән бау. *Тәзеһе тәзе түгел: өҙөлә лә куя, өҙөлә лә куя* (Әкиәттән).

**ТӘЗЕЛДӘҮ** *к. һөйл.* Нәҙек, әсе тауыш менән ҡысҡырыу. *Бер якта һағыҙаҡ һымаҡ ыжылдап .. Әхмәт йөрөй. Уға эйәреп Хәтдин карт тәзелдәй.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**ТӘЗКЕМ** *и. диал.* Һары йомран.

**ТӘЗКИР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Өгөт, нәсихәт рәүешендәге яҙылған әйбер, иҫтәлек. *Шәрук кылдым тәзкир вә тәхрифнамә яҙмакка.* «Батыршаның хаты».

**ТӘЗКИРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** *кар.* **тәзкир.**

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ТӘЗӘҮҮЕЖ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Өйләнәү, никахланыу.

**ТӘЗӘҮҮЕЖЛӘНЕҮ** *к. иҫк.* Өйләнешеү, никахлашыу.

**ТӘЙПӘК** *с. диал.* Йәйпәк.

**ТӘЙӘММӨШ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Һыу булмағанда ҡулды тупраҡҡа һуғып тәһәрәт алыу ысулы. *[Мулла:] һеҙ төрмә кешеләре, .. тәһәрәт алып тормағыҙ, тәйәммөш һуғығыҙ ҙа, шул ярар.* Ғ. Искәндәров.

**ТӘЙӘН** *р. диал.* Гел. *Тәйән бер һүҙ. Тәйән ауыр эштә эшләү.*

**ТӘКБИР** [*ғәр.*] *и. дини* Алланы ололап әйтелгән «аллаһы әкбәр» тигән һүҙ. *Тәкбир әйтеү.* ■ *Һуғышка алынған кешеләр тәкбир тауыштары аҫтында ауылдан сығып китте.* М. Ғафури.

**ТӘКЕ** *и. диал. кар.* **ябаға** 1. *Тәкеһен ҡойоу.*

**ТӘКЕЛӘНЕҮ** *к. диал.* Ойошоп кейеҙләнеү. *Йөн тәкеләнгән.*

**ТӘКИ** [*рус.* таки] *киҫ. һөйл.* Эш-хәлдәң һөҙөмтәһенә баҫым яһай; барыбер. *Әсәйем .. тәки мине эйәртмәне.* Р. Низамов.

**ТӘККӘ** *р. һөйл.* Сәбәпһеҙ, бушҡа. *[Йосоп:] Ни эшләп мин һине тәккә йығайым ти. Сана һалыулап китте бит.* С. Агиш.

**ТӘКЛЕ** *бәйл.* Тиклем.

**ТӘКЛИФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Бойороҡ. *Тәклиф яһау.* ■ *Билалдың: „Ҡыуыусыларҙы ҡыуырға кәрәк",— тигән тәклифенә штабтан яуап бирмәй һуҙҙылар.* А. Таһиров.

**2.** *кар.* **тәкәллеф.**

**ТӘКМӘК** *и. диал.* Туҡмаҡ, балға.

**ТӘКМӘРЛӘҮ** *к. һөйл. кар.* **тәкмәсләү** 2. *Тәкмәрләп китеү.*

**ТӘКМӘРЛӘШЕҮ** *к. һөйл. урт. кар.* **тәкмәрләү.** *Тәкмәрләшеп соҡорға төшөү.*

**ТӘКМӘС: тәкмәс атыу** баш аша әйләнеү. *Тәкмәс атып уйнау.* ■ *Улар [балалар] һикерә, урындыкта тәкмәс ата.* С. Агиш. *Рәмил .. яңы арыш һаламында тәкмәс атып уйнаны.* Р. Низамов.

**ТӘКМӘСЕҮ** *к.* Баш аша ҡолау; тәкмәсләү. *Тәкмәсеп барып төшөү. Тәкмәсеп китеү.* ■ *Мин тайып йығылып киттем, .. тәкмәсеп барып яттым.* Ж. Кейекбаев.

**ТӘКМӘСЛӘҮ** *к.* **1.** Баш аша әйләнеү; тәкмәс атыу. *Камил .. һикергеләп, тәкмәсләп алды.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Баш аша әйләнеп ҡолау; тәкмәсеү, мәтәлләү. *Аҡтарҙың дозоры күренә. Ғәзелша уға төҙәп ата. Теге сабып килгән ыңғайға тәкмәсләп-тәкмәсләп барып төшә.* В. Нафиков.

**ТӘКМӘСТЕРЕҮ** *к.* Баш аша әйләндереү; мәтәлләтеү. *Тәкмәстерә һуғыу.*

**ТӘКМӘС-ТҮКМӘС** *р.* Баш аша әйләнә-әйләнә, тәкмәсләй-тәкмәсләй. *Тәкмәс-түкмәс аунау. Тәкмәс-түкмәс барып төшөү.*

**ТӘКРАР** [*ғәр.*] *р. иҫк.* Ҡабаттан, яңынан. *Күңелем китабының баш биттәрен берәм-берәм тәкрар астылар.* М. Ғафури.

□ **Тәкрар итеү** ҡабатлау.

**ТӘКРАРЛАУ** *к.* Ҡабатлау, ҡабатлап тағы әйтеү, эшләү һ. б. *Бер һүҙҙе тәкрарлау.* ■ *Улар әүәлге булған хаталарын тәкрарламаны.* З. Шәрҡи.

**ТӘКӘ** [1] *и.* Һарыҡ-кәзәнең иркәге. *Бәрән тәкә. Көйҙөргән тәкә. Током тәкәһе. Тәкә малы алдан йөрөүсән була.* **Ҡусҡар** (*йәки* **үр**) **тәкә** тоҡом өсөн тотолған тәкә.

♦ **Күк тәкәһе** *диал.* һаралйын. **Ҡарттар тәкәһе** ҡоҙаларҙың ҡыҙ ҡоҙалай килгәндә күстәнәс тултырып килтергән һандығы. **Ҡыҙ тәкә** *кар.* **ҡыҙ. Тәкә мөгөҙө** өйрөлтөп сиккән биҙәк; ҡусҡар. **Һуҡыр тәкә** *диал. кар.* **һәпәләк** [2].

● *Аҡыллы тәкә һуйғанда, ахмаҡ йүкә һуйыр.* Мәҡәл. *Төкөшә торған тәкәгә хоҙай мөгөҙ бирмәгән.* Мәҡәл.

**ТӘКӘ** [2] *и.* Һыу арҡырыһына һалынған ҡоролмаға таяу рәүешендә ултыртырлған атлама йәки бағана. *Күпер тәкәһе.*

**ТӘКӘ** [3] *и.* Арҡан ишә торған ҡорамал (саталы ағас менән бәләкәй сананан ғибәрәт). *Уны [арҡанды] сығыр менән ишкән саҡта тәкәне әкрен генә йөрөтәм, сираҡ ишелһен, .. тим.* Н. Мусин.

**ТӘКӘ** [4] *и. диал.* Сей картуф бөрөп бешергән ваҡ бәлеш.

**ТӘКӘББЕР** [*ғәр.*] *с.* Үҙен эре, һауалы тотҡан, кешене тиңһенмәгән. *Тәкәббер кеше. Тәкәббер булыу.* // *Үҙеңде тәкәббер тотоу.* ■ *Беҙ тәкәббер халыҡ түгел, дуҫтар менән һин дә мин.* М. Кәрим. *Тәкәббер атлап урамдан Жоржик Хәйрушкин бара.* С. Кулибай.

**ТӘКӘББЕРЛЕК** *и.* Һауалылыҡ, эрелек. *Тәкәбберлек күрһәтеү.* ■ *Миңә ҡарата һауалы мөнәсәбәт күрһәткәс, миндә тәкәбберлек тойғоһо уянды.* Д. Юлтый.

**ТӘКӘББЕРЛӘНЕҮ** *к.* Үҙеңде бик эре, һауалы тотоу; тәкәбберлек күрһәтеү. *Минең күрше .. егерме берҙә генә. Сукеш тота белмәй, әммә тәкәбберләнә белә.* М. Сөндөклө.

**ТӘКӘЙ: тәкәй таҡмағы** *кар.* **таҡмаҡ.**

**ТӘКӘЛЛЕФ** [*ғәр.*] *и. кит.* **1.** Төрлө тантана, рәсми йолаларҙың ҡабул ителгән тәртиптә башҡарылышы; церемония. *Тәкәллеф менән ҡаршы алыу.*

2. Мөнәсәбәттәге, ҡылыҡтағы яһалмалыҡ, артыҡ әҙәпле булып ҡыланыу күренеше.

**ТӘКӘЛЛЕФЛЕ** *с. кит.* Тәбиғи булмаған, яһалма (кешенең мөнәсәбәтенә, ҡылығына ҡарата). *[Федор] оҙон мыйығын һыпыра биреп, тәкәллефле генә йылмайғандай итте.* В. Исхаков.

**ТӘКӘЛЛЕФЛӘНЕҮ** *к.* Тейешле тәртип, әҙәп һаҡларға, нәҙәкәтле булырға тырышыу. *Тәкәлләфләнәп, сакырғанды көтөп, уҙмай тороу.*

**ТӘКӘЛЛЕФҺЕҘ** *с. кит.* Мөнәсәбәтендә, ҡылығында яһалмалылыҡ, ялғанлыҡ булмаған; ысын күңелдән башҡарылған, ябай булған. *Тәкәллефһеҙ мөғәмәлә. // Тәкәллефһеҙ һөйләшеү.* ■ *Шул хакта бик асыҡ иттереп, тәкәллефһеҙ генә хат яҙ әле.* М. Ғафури.

**ТӘКӘЛӘҮ** *к. һөйл.* Мәрәкәләп төрттөрөү. *Кешене тәкәләү.*

**ТӘКӘ-МӨКӘ** *и. диал.* Әкәм-төкәм.

**ТӘКӘРШЕ** *р. диал. кар.* **оторо** 2, 3.

**ТӘКӘС** *и. һөйл.* Тәкә бәрән.

**ТӘКӘҮЕЗ** *с. диал.* Үҙ һүҙле. *Тәкәуез кеше.*

**ТӘКӘҮЕР** *и. диал. кар.* **тибенге** 1.

**ТӘҠБИР** [*гәр.*] *и. кар.* **тәкбир.**

**ТӘҠБӘҘӘЛӘҮ** *к. диал.* Бөтмөрләү, тәпсирләү. *Тәкбәҙәләп эшләү.*

**ТӘҠДИД** [*гәр.*] *и. иҫк.* Үлсәм, һан. *Һис тә тәкдидһеҙ һәм сикһеҙ хөрриәтте мин һөйәм.* М. Ғафури.

**ТӘҠДИМ** [*гәр.*] *и.* **1.** Ҡарау, хәл итеү өсөн кемдеңдер ҡарамағына ҡуйылған мәсьәлә, фекер, эш һ. б. *Рационализаторлыҡ тәкдиме. Тәкдим индереү.* ■ *[Мәрйәм:] һеҙгә ҡайтырға алыҫ булһа, беҙҙә ҡуныгыҙ .. — тине. Мин был тәкдимгә күнмәнем, һылтау таптым.* Д. Юлтый.

2. Ир кешенең ҡатын-ҡыҙҙы үҙенә тормошҡа сығырға һорауы.

□ **Тәҡдим итеү** 1) нимәнелер бирергә, нимәлер эшләргә теләк белдереп, кемдеңдер ҡарамағына ҡуйыу. *Урын тәкдим итеү. Ярҙам тәкдим итеү.* ■ *[Егет] ике ҡыҙға башын эйеп, тәкдим итте алған букетын.* Ғ. Хәйри; 2) берәй мәсьәлә, фекер, эште һ. б. кемдеңдер ҡарамағына ҡуйыу. *Сәйҙел тәкдим итте бер ресторанга керергә.* Ғ. Сәләм. **Тәҡдим яһау** үҙеңә тормошҡа сығырға үтенес белдереү. *Егет Заремаға тәкдим яһарға карар итте.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТӘҠДИР** [*гәр.*] *и.* **1.** Халыҡ ышаныуынса, ниндәйҙер илаһи көс тарафынан алдан билдәләнгән яҙмыш, күрәсәк. *Тәкдиргә буйһоноу. Тәкдиргә яҙылыу.* ■ *Крәҫтиәндәң тәкдиргә ышаныуы уның .. тәбиғәттең күп күренештәренә төшөнә алмауынан килә.* И. Насыри. *[Нина:] Кауышыу ярамағандыр ҙа .. Нишләйем һуң тәкдирем һин булгас.* Д. Исламов. **Хоҙа** (*йәки* **алла**) **тәҡдире** алла билдәләгән яҙмыш, алла ҡушҡан күрәсәк. / Алдан билдәләнгән үлем сәғәте; әжәл. *Һөйләгән дә гәләм ай һөйләһен, тәкдир етмәй әҙәм үләме* (Халыҡ йырынан).

2. Урын-ваҡыт килеш аффиксы менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*кар.* **тәҡдирҙә**).

□ **Тәҡдир итеү** 1) эшләгән эште таныу, баһалау. *[Сафа] хәлфәнең миңә булған якшығылын мин әле лә тәкдир итәм, онота алмайым.* М. Ғафури; 2) *һөйл.* насип итеү, насип булыу. *Күрешергә тәкдир итһен.*

**ТӘҠДИРҘӘ** *бәйл. функцияһында* Сифат ҡылымдаң *-ған* формаһынан һуң килеп, эш-хәлдең булыу-булмауына бәйле шартты белдерә. *Онотҡан тәкдирҙә.* ■ *Үҙең белгән-кисергәнде яҙған тәкдирҙә генә әҫәр якшы сыға.* К. Әхмәтйәнов. *Министрға хат яҙ.., ебәрмәгеҙ тиген ят ергә. Таш киҫергә риза, үлым, тиген, калабыҙҙа калған тәкдирҙә.* Т. Арслан. / **ла** көсәйтеү киҫәксәһе менән, төп фекергә кире мәғәнәләге эш-хәлде белдерә. *Белгән тәкдирҙә лә.* ■ *Ҡайһы бер йәштәр .. үткән менән бер ҙә ҡыҙыҡһынмайҙар. Ҡыҙыкҡан тәкдирҙә лә, уны тарих итеп түгел, экиәт итеп тыңлайҙар.* С. Агиш. *Мин барыбер китмәм. Киткән тәкдирҙә лә, мин бит һине бер яңғыҙың итмәм.* М. Кәримов.

**ТӘҠДИРЛӘҮ** *к.* Тәкдир итеү, баһалау. *Эй, гүмер!.. Киттең эрәм тәкдирләп һанай алманым.* М. Сабит.

**ТӘҠЛИД** [*гәр.*] *и. кит.* Кемгә йәки нимәгәлер бёрәүҙең эйәреүе, эйәреп эш итеүе. *Тыумаһын, һүнһен ижад, һин мең йәшә, тәклид, йәшә!* Ш. Бабич.

□ **Тәҡлид итеү** (*йәки* **ҡылыу**) эйәреп, оҡшатып эшләү; эйәреү. *Бисара шәкерттәр әллә кемдәргә тәклид ҡылып ҡына .. забастовка яһағандар, имеш.* М. Ғафури.

**ТӘҠЛИДӘН** [*гәр.*] *р. иҫк. кит.* Оҡшатып, эйәреп. *Ҡобайырға тәклидән яҙыу.*

**ТӘҠРАР** [*гәр.*] *р. кар.* **тәкрар.**

**ТӘҠРИЗ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Яҙма хеҙмәткә бирелгән баһа; рецензия. *Тәкризгә биреү.* ■ *Әҫәрҙәр һатылып бөтә, шуларҙың ҡайһы берейһенә тәнкит түгел, газета биттәрендә тәкриз дә яҙылмай.* Д. Юлтый.

**ТӘҠРИР** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Аңлатма. *Сук заман тәкрир һөйләп, аңлашылмаҫ гизле эш.* С. Яҡшығолов.

□ **Тәҡрир итеү** (*йәки* **ҡылыу**) һөйләп биреү, аңлатыу. *Был ер һатҡан халыҡты өскә бүлдем ки һәр берен аңлатып, тәкрир иттем* (Бәйеттән).

**ТӘҠСИМ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Бүленеш.

□ **Тәҡсим итеү** (*йәки* **ҡылыу**) бүлеү, бүлгеләү. *Ерҙәребеҙҙе, һыуҙарыбыҙҙы дүрт ырыу тәксим итеп ала.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ТӘҠСИР** [*гәр.*] *и. иҫк.* Дәрәжәһе ҙур кешеләргә ололап өндәшеү һүҙе. *[Мулла:] Ғималетдин, үҙең колхоз булгас, миңә калдыр инде кашканы. Хакын, тәксир, инде ҡыҙғанмабыҙ.* Х. Ҡунаҡбай. *[Хәҙрәт:] Шәрәфетдин! — тип ҡысҡырыу менән бер аҡ һакаллы кеше: — Бында, тәксир! тип аяҡ өҫтөнә ҡалкты.* М. Ғафури.

**ТӘҠҮӘ** [*гәр.*] *с.* Дин йолаларын боҙмай үтәүсән, дингә ныҡ бирелгән; динсел. *Тәкүә кеше. Тәкүә булыу.* ■ *Хисбулла йәп-йәш көйө, оҙон елән кейеп, мәсеткә йөрөнө. Шундай тәкүә егет килеп сығыуына [ололар] ҡыуанып та, һоҡланып та бөтә алманы.* З. Биишева.

**ТӘҠҮӘЛЕК** *и.* Тәкүә булыу сифаты. *Тәкүәлеге менән танылган кеше.*

**ТӘКӘБЕЛ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Бәрәбәр, тиң.

**ТӘКӘТ** [*гәр.*] *и.* **1.** Нимәгәлер сыҙап торорлоҡ көс, түҙемлек хәл. *Тәккәт етмәү. Тәкәтте алыу.* ■ *[Хәсбикамал:] Булмай, булмай — тәкәтем*

*юк, биҙҙерҙе, тамам ялкытты.* Ш. Бикҡол. *Күҙ алдарым тондо, тәҡәт бөттө, туңам, ахыры, барған көйөмә.* С. Ғәбиҙуллин. *Арыҫландың теңкәгә тейеүенән тәҡәттәре ҡалмаған.., урмандағы йәнлек йыйылып кәңәш итте, ти* (Әкиәттән).

**2.** Йән, тән тыныслығы. *Тәҡәт бирмәү.* ■ *Күҙ генәйем йоҡо алмайҙыр, йөрәкәйем тәҡәт тапмайҙыр* (Халыҡ йырынан).

□ **Тәҡәт итеү** (*йәки* **тотоу**) сыҙау, түҙеү. *[Сәйҙеямал:] Әллә ауыр күтәреп, эсем төшөп ҡуйҙы инде?.. Тәҡәт тотор хәл юк.* Я. Хамматов. *Нисек тәҡәт иттең икән яраланған саҡтарҙа* (Бәйеттән).

♦ **Тәҡәткә тейеү** *йәки* **тәҡәтте ҡоротоу** нимә менәндер бимазалап теңкәгә тейеү, йөҙәтеп бөтөрөү. *[Оләсәһе] Тәлгәттең ҡайҙандыр бер көсөк алып ҡайтыуына зарланды: — Шул мәхлүк .. көнө буйына шыңшып тәҡәтемде ҡорота.* В. Исхаков. **Тәҡәт ҡороу** 1) түҙемлек бөтөп хәлдән тайыу, йөҙәп бөтөү. *Беҙгә йылға аша сығырға бирмәйҙәр, пулемёттар таҡылдап ҡына торалар .. Тәҡәт ҡороно бит.* Б. Хәсән; 2) дәрт итеп, түҙемһеҙләнеү. *Һунарға сығам тип, тәҡәте ҡорой.*

**ТӘҠӘТҺЕҘ** *с.* **1.** Түҙә алмаҫлыҡ, сыҙамаҫлыҡ. *Тәҡәтһеҙ һыуыҡ. Тәҡәтһеҙ булып һағыныу. Тәҡәтһеҙ итеү.* ■ *Төн. Көҙгө ҡараңғы төн. Тәҡәтһеҙ елдәр һыҙғыра.* А. Игебаев.

**2.** *р. мәғ.* Бик ныҡ, сикһеҙ. *Тәҡәтһеҙ ауыр.* ■ *Сәсеү бөткәнен генә көткән кеүек, ҡапыл ҡороға китте, тәҡәтһеҙ ҡыҙҙыра башланы.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТӘҠӘТҺЕҘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Сабырлыҡ бөтөп борсола башлау, хафаланыу. *Тағы һуғыш. Тағы атайың сапты яуға,— ти әсәйем тәҡәтһеҙләнеп.* К. Кинйәбулатова.

**ТӘЛБАҠА** *и. диал.* Тәлмәрйен.

**ТӘЛГЕ** *и. һөйл.* Һарына бутҡаһы.

**ТӘЛГӘШ** [1] *и.* **1.** Бер һукталағы емеш суғы. *Балан тәлгәше. Миләш тәлгәше.* ■ *Сугылйым суҡ ҡарағат тәлгәшен түбән эйгән.* А. Игебаев.

**2.** Бер һабаҡтағы суҡ япраҡ йәки сәскә. *Сәскә тәлгәше.* ■ *Тәлгәшен эйеп, талдай бөгөлөп, зифа ҡайын ҡосорға теләй [шыршы] дуҫҡайын.* Я. Ҡолмой.

**ТӘЛГӘШ** [2] *с.* Суҡланып торған емешле йәки япраҡлы; суҡ. *Тәлгәш ҡайын. Тәлгәш муйыл.*

**ТӘЛГӘШЛЕ** *с.* Тәлгәше күп булған, емеше йәки сәскәһе суҡланып торған. *Тәлгәшле еләк. Тәлгәшле муйыл.*

**ТӘЛГӘШЛӘНЕҮ** *ҡ.* Тәлгәшлегә әйләнеү, тәлгәшле булыу. *Ҡыйбатлы мәрйен кеүек, ҡып-ҡыҙыл емештәр тәлгәшләнгән.* Н. Ҡәрип.

**ТӘЛГӘШЛӘҮ** *ҡ.* Тәлгәшле итеү. *Емеште тәлгәшләп йыйыу.*

**ТӘЛДЕРМӘС** *и.* **1.** Ҡауырһын ҡуйылмаған, еңел, нәҙек уҡ.

**2.** *с. мәғ. ҡусм. һөйл.* Еңел холоҡло.

● *Тәлдермәс ҡатын сығарыр иренең яманатын.* Мәҡәл.

**ТӘЛҠИН** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Өгөт-нәсихәт. *Ҡайҙалыр, ҡала ситендәге бер ҡышлаҡта берәү думбыра сиртә, тәлҡин әйтә.* А. Таһиров.

□ **Тәлҡин итеү** (*йәки* **ҡылыу**) өгөтләү, өйрәтеү. *«Шулай йөрөһәң генә һин мөьмин»,— тип, миңә иман тәлҡин ҡылдылар.* М. Ғафури.

**ТӘЛМӘРЙЕН** *и.* Артҡы оҙон аяҡтары ерҙә һикереп йөрөүгә яраҡлашҡан, ҡойроҡһоҙ ер-һыу йәнлеге. *Йәшел тәлмәрйен. Һары тәлмәрйен.* ■ *Күләүектә тәлмәрйендәр баҡылдаша.* З. Биишева.

♦ **Тәлмәрйен ебәге** *диал.* ылымыҡ, баҡасай. **Тәлмәрйен тәңкәһе** һыу өҫтөндә йөҙөп йөрөгән ваҡ ҡына түңәрәк япраҡлы күл үләне. **Тәлмәрйен үләне** ваҡ аҡ сәскәле, һыу өҫтөнә түшәлеп үҫкән бәләкәй генә түңәрәк япраҡлы үлән. **Тәлмәрйен япрағы** һыу ситендә үҫә торған аҫҡы яғы аҡ төҫтәге эре япраҡлы үлән.

**ТӘЛПӘК** *с. һөйл.* Төймә кеүек бәләкәй (танауға ҡарата).

**ТӘЛТ** *с. һөйл.* Ҡалын булмаған, йоҡа (ҡар ҡатламына ҡарата).

**ТӘЛТЕМ** [1] *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**ТӘЛТЕМ** [2] *и. диал.* Тәлдермес.

**ТӘЛТЕМСӘЙ** *и. диал.* Ҡуянтубыҡ.

**ТӘЛӘЗЗЕЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тәм, ләззәт. *Илаһи бер тәләззез берлә тамған ынйылай йәштәр.* Б. Мирзанов.

**ТӘЛӘКӘ** [1] *и.* **1.** Мыҫҡыллы, төртмә һүҙ.

**2.** *диал.* Ҡотҡо. *Тәләкә таратыу.*

□ **Тәләкә итеү** мыҫҡыл итеү, мәрәкәләү.

**ТӘЛӘКӘ** [2] *и. диал.* **1.** *ҡар.* **тейәк.**

**2.** Ишектәге бороп асмалы ағас, бик.

**ТӘЛӘКӘЛӘҮ** *ҡ.* Кемделер мыҫҡыллы, төртмә һүҙ менән мәрәкәләү. *Тәләкәләп әйтеү.* ■ *Һин, кеше тәләкәләп торма әле.* М. Тажи.

**ТӘЛӘКӘСЕ** *и.* Тәләкәләргә яратыусан; мәрәкәсел.

**ТӘЛӘҠҠИ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кем йәки нимәгәлер тап килеү, осрау күренеше.

□ **Тәләҡҡи итеү** осратыу.

**ТӘЛӘФ** [*ғәр.*] *и.* Әрәм ителгән, исраф булған хәл. *Тәләфкә сығарыу.*

□ **Тәләф булыу** 1) файҙаһыҙ, әрәмгә китеү; исраф булыу. *Ашлыҡ күп тәләф булды* 2) һәләк булыу, юҡ булыу. *Мансурҙы таныған.., еңгәһәнең дә бәхет эҙләп ҡалаға күсеп китеүен, йорт-еренең һатылып тәләф булыуын аңлаттылар.* Ә. Хәкимов. **Тәләф итеү** (*йәки* **ҡылыу**) 1) юҡҡа, файҙаһыҙға ебәреү; әрәм-шәрәм итеү, исраф ҡылыу. *Игендең бөртөгөн дә тәләф итмәҫкә тырышыу;* 2) һәләк итеү, юҡ итеү. *Бүреләр ваҡ малды тәләф итә.*

**ТӘЛӘФЛӘНЕҮ** *ҡ.* Тәләф булыу (*ҡар.* **тәләф**). *Тапалып тәләфләнгән бесән.*

**ТӘЛӘФЛӘҮ** *ҡ.* Тәләф итеү (*ҡар.* **тәләф**). *Игенде тәләфләмәй йыйып алыу.* ■ *[Тәкбиров:] Юҡ-барға аҡса тәләфләргә беҙгә бер кем дә рөхсәт итмәй.* Н. Мусин. *Быйыл көҙ [Ғәйзулла бабайҙың] һыйырын айыу тәләфләгән икән.* Т. Сағитов.

**ТӘМ** [1] *и.* **1.** Нәмәнең телгә беленгән үҙенсәлекле сифаты. *Асы тәм. Әскелтем тәм. Бал тәме. Һөт тәме. Тәм һиҙеү ойгандары.* ■ *Аштан йүкә тәмеме, тимер тәмеме килә.* Д. Юлтый. **Тәме әйтеү** ниҙеңдер тәме килеү. *Шиғырым һин — эрем тәме әйткән, көйөп бешкән арыш икмәге.* Р. Ғарипов. / Аҙыҡтың ашау, эсеү теләген уятҡан яҡшы сифаты. *Тәмен ебәреү. Тәмен белеп*

*ашау.* ■ *[Ғәзимә:] Туң май бауырһактың тәмен ала.* Һ. Дәүләтшина. *Рамазан гөлйемеш өҙөп капты .. Бер ниндәй ҙә тәме юк ине гөлйемештең.* Р. Низамов.

**2.** *күсм.* Ниҙер биргән яҡшы хис; ләззәт. *Тормош тәме. Эш тәме. Эштән тәм табыу.* ■ *Әсәлек тәмен татымаған кеше балаларҙы йәлләй белерме лә, карай белерме?* З. Биишева. *Көрәш тәмен белмәй, меҫкен дә һуң куркак кешеләр.* М. Хәй.

♦ **Ауыҙ тәмен китәреү** (*йәки* **ебәреү**) бер-береңә насар һүҙ әйтеү, талашыу.

● *Күп ашның тәме юк.* Мәҡәл.

**ТӘМ** ²: **тәм итеү** *шул ук* **там итеү** (*кар.* **там** 4)

**ТӘМҒЫ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Тамғы.

**ТӘМЕЗ** *и. диал.* Әмзә.

**ТӘМЕҮ** *к.* Тоҫҡап бәреү. *Таш тәмеү. Тәмеп тейҙереү.*

♦ **Тәмер туп** уйын исеме (бер бәләкәй таҡта ҡуялар; бер бала таҡта эргәһенә һаҡҡа баҫа, ҡалғандары көтөүсе булып, ун-ун биш аҙым алыҫлыҡта ҡаршыға тора; һаҡтағы бала көтөүселәргә туп ырғыта, улар тупты тотоп, таҡтаға тейҙерергә тырыша; тупты тейҙергән бала һаҡсыға әйләнә, һаҡтағы бала көтөүселәр яғына сыға).

**ТӘМЕШ** *и.* Уйын исеме (метр ярымдан уратып, уйында ҡатнашыусылар һанынса бәләкәй генә соҡорҙар яһала; түңәрәктең уртаһында туп һыйырлыҡ бер оя була; уйындағы бөтә кеше ҡулына таяҡ тота; һәр береһе үҙ соҡорона таяғын ҡуйып тора ла, ҡапыл ғына урталағы тупты һуғып сығарырға тырыша; шул арала уның буш ҡалған соҡорона көтөүсе үҙ таяғын ҡуйып өлгөрһә, ул көтөүселектән сыға, соҡорон юғалтҡан кеше көтөүсе була).

**ТӘМЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **тәмеү**. *Туп тәмешеп уйнау.*

**ТӘМИЗ** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Таҙа.

**ТӘМИЗЛӘҮ** *к. иҫк. кит.* Таҙартыу. *Йылғаның сыға торған ерен һыуҙы боҙа торған нәмәләрҙән тәмизләмәк, пакламаҡ тейеш.* З. Һаҙый.

**ТӘМЛЕ** *с.* **1.** Тәме яҡшы. *Тәмле аш. Тәмле еҫ. Тәмле сәй. Тәмле һыу. Тәмле итеп бешереү.* ■ *Муйылбикәнең һурпалы ит турҙағы ла, тары бутҡаһы ла, йомғаҡлы аҡ майҙары ла бик тәмле тойолдо.* Һ. Дәүләтшина. *Помидорҙар шәп бит, әй. Бына был ҡыҙылы бигерәк тә тәмле.* С. Агиш.

**2.** *күсм. кар.* **татлы** 3.

♦ **Аш** (*йәки* **сәй**) **тәмле булһын!** ашап ултырған кешеләргә яҡшы теләк итеп әйтелә. **Тәмле тамаҡ** *шул ук* **татлы тамаҡ** (*кар.* **тамаҡ**).

**ТӘМЛЕКӘЙ** *и. кар.* **татлыҡай.**

**ТӘМЛЕЛЕК** *и.* Аҙыҡтың тәмле булыу сифаты, тәмле үҙенсәлеге. *Ҡуйылығы ҡаймаҡтай, тәмлелеге һарҡыттай һаба-һаба ҡымыҙы .. [бар] Урал тау* (Ҡобайырҙан).

**ТӘМЛЕ-ТАТЛЫ** *с.* Тәмле, татлы булған (ғәҙәттә кәнфит, печенье төрлө емеш һ. б. ҡарата әйтелә). *Тәмле-татлы нәмәләр. // Тәмле-татлыға әүәҫ булыу.* ■ *Тулып тәмле-татлы емешкә, өҫтәлдә ҙур ваза ултыра.* Я. Ҡолмой. *Ә Шәүәли .. тәмле-татлы ярата.* Б. Бикбай.

**ТӘМЛЕ-ТОМЛО** *с. кар.* **тәмле-татлы.** *Тәмле-томло ризыҡтар.* ■ *[Балаларға] тәмле-томло нәмәләр, услап-услап бауырһаҡ .. тотторҙолар.* К. Мәргән.

**ТӘМЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Яҡшы тәм өҫтәү, тәмле итеү. *Бал ҡушып тәмләндереү.* ■ *Алтын табаҡ тәмләндермәй тәмһеҙ ашты.* Р. Шәғәлиев.

**ТӘМЛӘНЕҮ** *к.* Тәмлегә әйләнеү, тәмле булыу. *Борос һалғас, аш тәмләнде.*

**ТӘМЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **тәмләү.** *Ашты тәмләтеү.*

**ТӘМЛӘТКЕС** *и.* Аш-һыуға үҙенсәлекле тәм йәки еҫ биреү өсөн ҡушылған нәмә (борос, ҡорот, лавр япрағы, ҡәнәфер һ. б.). *Итте тәмләткестәр һалып бҡтырыу.* ■ *[Ашҡаҙан ауыртҡанда] борос, горчица кеүек тәмләткестәр менән мауығырға ярамай.* В. Ғүмәров.

**ТӘМЛӘҮ** *к.* **1.** Яҡшы тәм өҫтәү, тәмле итеү; тәмләндереү. *Шәкәр менән тәмләү.*

**2.** Ауыҙға алып, тәмен тикшереү. *Шүлгән ҡанды тәмләп ҡарамаҡсы булды.* «Урал батыр».

**3.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында аш-һыуҙың тәмен белеп, ләззәтләнеп ашағанды белдерә. *Тәмләп сәй эсеү.* ■ *Ҡоро сәй менән ҡара икмәк бик тәмләп ашалды.* Ғ. Дәүләтшин. / *күсм.* Берәй эштең ләззәтен табып, рәхәтләнеп башҡарғанды белдерә. *Тәмләп йоҡлау. Тәмләп-тәмләп һөйләү.* ■ *[Фатих] йөгө өҫтөнә менеп ултырҙы ла, бик тәмләп кенә тәмәке төрөргә тотондо.* Б. Ишемғол.

● *Тирләп эшләһәң, тәмләп ашарһың.* Мәҡәл.

**ТӘМСЕЛ** *с.* Тәмлене яратыусан, тәмде яҡшы белгән. *Бал алырлыҡ сәскә түгел икән — тәмсел бал ҡорттары ҡунмай уға.* Ҡ. Даян.

**ТӘМҪИЛ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Аллегорик сағыштырыу алымы. *[Ш. Бабич] өсөн тәмҫил — юғары идеалдарҙы халыҡ күңеленә яҡынайтыу формаһы ине.* К. Әхмәтйәнов.

**ТӘМ-ТОМ** *и. йыйн.* Төрлө тәмле-татлы аҙыҡ һәм тәмләткес нәмәләр. *Ашҡа тәм-том һалыу.* ■ *Ҡаҙ ите ашалды, тирләп-бешеп, тәм-том менән сәй ҙә эселде.* Ф. Рәхимғолова.

**ТӘМҺЕҘ** *с.* **1.** Тәме насар. *Тәмһеҙ еҫ.* ■ *Ауыҙҙан тәмһеҙ ҡара һыу ҡойола.* Д. Юлтый. *Илдәрегеҙ йәмһеҙ, һыуығыҙ тәмһеҙ, үҙ илемә ҡире ҡайтайым* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Ҡыуаныс килтермәгән, ләззәт бирмәгән. *Тәмһеҙ тормош.*

**3.** *күсм.* Күңелде ҡыйырһытҡан, насар. *Тәмһеҙ һүҙ.* / *һөйл.* Күңелде биҙҙергес, ҡәҙерһеҙ. *Тәмһеҙ кеше.*

**ТӘМҺЕҘЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Тәмһеҙгә әйләнеү, тәмһеҙ булыу. *Аш тәмһеҙләнә.* / Насар тәм барлыҡҡа килеү. *Йыуанан ауыҙ тәмһеҙләнде.*

**2.** *күсм.* Әҙәпһеҙлек йәки әрһеҙлек менән күңелде биҙҙереү; ҡәҙерһеҙләнеү. *Тәмһеҙләнеп йөрөү.*

**ТӘМҺЕҘЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **тәмһеҙләү.**

**ТӘМҺЕҘЛӘҮ** *к.* Тәмһеҙгә (1 мәғ.) әйләндереү, тәмһеҙ итеү. *Ашты тәмһеҙләү. Һалҡын һөт сәйҙе тәмһеҙләй.*

**ТӘМҺӘЙ** *с. диал.* Секрей. *Тәмһәй күҙле кеше.*

**ТӘМӘЖНИК** *и. һөйл.* Тәмәкесе.

**ТӘМӘЙТЕҮ** *к. һөйл.* Ниндәйҙер бер тәм булыу, тәм килеү. *Һөттән әрем тәмәйтә.*

**ТӘМӘКЕ** [*рус.* табак 〈 *исп.*] *и.* **1.** Эт ҡарағаты һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, аҡ, алһыу йәки ҡыҙыл суҡ сәскәле, япрағы никотинға бай үлән. *Тәмәке сәскәһе. Тәмәке япрағы. Тәмәке ултырғыу.*

**2.** Шул үләндең тартыу, еҫкәү йәки сәйнәү өсөн киптереп ваҡланған япрағы. *Тәмәке еҫе. Тәмәке төпсөгө. Тәмәке төтөнө. Тәмәке еҫкәү. Тәмәке төрөү.* ■ *Комбайнёрҙар ерҙең әҙерәк еллә́гәнен көтөп, тәмәке көйрәтә.* Ә. Вахитов.

**ТӘМӘКЕСЕ** *и.* Тәмәке тартҡан, тәмәке тартырға әүәҫләнгән кеше.

**ТӘН** [*фарс.*] *и.* **1.** Кеше һәм башҡа бөтә йән эйәләренең барлыҡ организмы, тышҡы ағзалары һәм кәүҙәһенән торған булмышы. *Тән төҙөлөшө. Тән ағзалары. Тән йылыһы. Тән сымырлап китте. Бөтә тән менән ҡалтырау.* ■ *Һыу ҡыҙының бар тәне һыуҙан, нурҙан яһалған.* «Аҡбуҙат». / Кешенең рухи хәленә, булмышына ҡапма-ҡаршы рәүештә әйтелә. *Тән ауырайыу. Тән еңеләйеү.* ■ *Ах, ҡайнар һыуҙың рәхәтлектәре! Малайҙарҙың тәндәре һары майҙай ирене лә китте.* Ф. Иҫәнғолов. *Ағиҙелкәйҙәрҙең ай һауаһы йәнгә рәхәт, тәнгә ҙур файҙа* (Халыҡ йырынан)./ Кешенең буй-һыны, кәүҙәһе. *Тәнгә һылашып торған күлдәк.* ■ *[Мәжит ағай] тәненең бөтә ауырлығын таяҡҡа һалып, һалмаҡ ҡына атлап бара.* Ә. Бикчәнтәев.

**2.** Кеше һәм хайуандарҙың кәүҙәһендәге мускул, ит. *Лупшыҡ тән. Тығыҙ тәнле кеше.* Тәнгә **ит ултырыу** һимереп тән тығыҙланыу, көрәйеү. / Кәүҙәнең тышҡы ҡаты; тире. *Аҡ тән. Ҡояшҡа янған тән. Тән күҙәнәктәре. Тән ҡытыршыланыу. Тән ҡыҙарыу.* **Ала тән** тош-тош ере ап-аҡ булып торған тән.

♦ **Йән дә тән бөтә көскә.** *Йән дә тән эшләү.* **Ҡош тәне ҡалҡыу** *кар.* **ҡош. Тән тартмау** күңелгә ят булыу; сирҡандырыу. *Кеше күлдәген кейергә тәнем тартмай.* **Эҫе** (*йәки* **йылы**) **тәнеңдә туҙһын** яңы кейемде ҡотлап әйтелә. *Күлдәгең ҡотло булһын, эҫе тәнеңдә туҙһын.*

**ТӘНАССАР: тәнассар итеү** *иҫк.* ярҙам итеү. *[Ғәскәрҙең] ҡалғаны мишәр, башҡорт, тәнассар иткән ҡалмыҡтарҙан тора ине.* М. Һаҙыев.

**ТӘНАСЫБ** [ғәр.] *и. иҫк. кит.* Бер-береһенә оҡшағанлыҡ, тура килгәнлек. *Милләттәр араһындағы тәнасыб.*

**ТӘНБИҺ** [*ғәр.*] *и.* Киҫәтеп, иҫкәртеп әйтелгән һүҙ; киҫәтмә, иҫкәртмә. *Тәнбиһ яһау.* ■ *[Балтачев — шәкерттәргә:] Рөхсәтһеҙ .. рәсем төшөрөп ултырғанығыҙ өсөн тәнбиһ вә шелтә.* С. Агиш.

□ **Тәнбиһ итеү** (*йәки* **ҡылыу**) иҫкәртеү, киҫәтеү. *Арағыҙға шпиондар ингән. Беҙҙең алдан тәнбиһ итеүебеҙгә ҡарамаҫтан, шуларҙы тотоп бирмәнегеҙ.* Д. Юлтый.

**ТӘНҠИҘӘН** [*ғәр.*], *р. иҫк. кит.* Тәнҡит йөҙөнән, тәнҡитләп. *Яңыларҙы тәнҡиҙән яҙмай сыҙап булмаҫ тиеп уйланым.* Ш. Бабич.

**ТӘНҠИТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ыңғай күренештәрҙе баһалау, етешһеҙ яҡтарҙы бөтөрөү маҡсатынан эшләнгән тикшереү эше. *Тәнҡит һүҙе. Үҙ-үҙеңә тәнҡит яһау. Тәнҡит менән сығыш яһау.* ■ *[Председатель:] эштәге етешһеҙлектәрҙе беребеҙгә күрһәтеп үтәйек. Тәнҡитһеҙ булмай ул.* М. Тажи.

**2.** Әҙәби, ғилми һәм башҡа төр әҫәрҙәрҙе тикшереү, уңышлы, етешһеҙ яҡтарын күрһәтеүгә бағышланған әҙәби жанр. *Кәңәш биреү, яҙыусыға ярҙам итеү өсөн әҙәби тәнҡит булырға тейеш.* Ғ. Хөсәйенов.

□ **Тәнҡит итеү** тәнҡитләү.

**ТӘНҠИТЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **тәнҡитләү.** *Күп тапҡыр тәнҡитләнгән әҫәр.*

**ТӘНҠИТЛӘҮ** *к.* Етешһеҙ яҡты күрһәтеү. *Әҫәрҙе тәнҡитләп яҙған мәҡәлә. Ҡаты тәнҡитләү. Үҙ-үҙеңде тәнҡитләү.* ■ *Колхозсылар берәм-берәм тороп, колхоз председателенең етешмәгән яҡтарын тәнҡитләп ташланы.* К. Мәргән.

**ТӘНҠИТСЕ** *и.* Тәнҡит жанры менән шөғөлләнеүсе әҙип.

**ТӘНТЕРӘК** *и. һөйл.* Тәнтерәкләп йөрөгән кеше.

**ТӘНТЕРӘКЛӘҮ** *к.* Аяҡ быуындарын тота алмай, ҡалтырау. *Тәнтерәкләп атлау. Тәнтерәкләп йөрөү.* ■ *[Бикбулат] тәнтерәкләп торҙо ла, ситәнгә барып һөйәлде.* С. Агиш.

**ТӘНТЕРӘТЕҮ** *к.* Иҫәнгерәтеп быуынһыҙ итеү. *Тәнтерәтә һуғыу.*

**ТӘНТЕРӘҮ** *к.* **1.** Иҫәнгерәп быуынһыҙ булыу. *Тәнтерәп тороу. Шау-шыуға тәнтерәп китеү.*

**2.** *кар.* **тәнтерәкләү.** *Тәнтерәй-тәнтерәй атлау.*

**ТӘНТЕҮ** *к. диал.* Тәнтерәкләү. *Тәнтей-тәнтей атлау.* ■ *Ул [Ирназар] тәнтеп китте, үҙ аяғына үҙе эләгеп йығылды.* Н. Мусин.

**ТӘНӘЗЗЕЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Түбәнселек. Тәнәззел **итеү** түбәнселек күрһәтеү. *Ҡул биреү, сәләм алыуға һис тәнәззел итмәй ул; халыҡ, ябай кешегә серҙәрен белгертмәй ул.* М. Ғафури.

**ТӘНӘЗЗЕҺ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Күңел асып йөрөү, күңел асыу сәйәхәте. *Тәнәззеһкә сығыу.*

**ТӘНӘЙ** *и.* **1.** Сабый бала; бәпес. *[Хажгәле:] Әсәһе, мынау тәнәй өшөгән. Бирсәле нимәң бар?* Я. Хамматов.

**2.** Йәшкә кесе туған, сабый йәшендәге ҡусты йәки һеңле./ Кесе йәштәге кешеләргә өндәшеү һүҙе. *[Әбей — Нурийәнгә:] Әйҙә уҙ, тәнәй, йәтим бала һымаҡ ишек төбөндә торма.* С. Кулибай.

**3.** *диал.* Ҡәйнеш.

● *Тәнәй аяҡҡа баҫҡанда, бабай таяҡҡа ҡала.* Мәҡәл.

**ТӘНӘЙЛӘҮ** *к.* Бала табыу; бәпесләү. *[Хан ҡыҙҙан:] Ерәнсә сәсән өйҙәме? .. Ни эшләп ята? — ти. [Ҡыҙ:] Тәнәйләп ята,— ти* (Көләмәстән).

**ТӘНӘФЕС** [*ғәр.*] *и.* Йыйылыш, тамаша барғанда, шулай уҡ дәрес араһында ял итеү өсөн туҡтау, ял ваҡыты. *Ҙур тәнәфес. Тәнәфес иғлан итеү. Тәнәфескә сығыу.* ■ *Тәнәфес ваҡытында Ғәзиз Әмирович уҡытыусылар бүлмәһенә инде.* С. Агиш.

**ТӘҢГӘ** *и. диал.* Артлы ултырғыс.

**ТӘҢГӘЛ** [1] *и.* **1.** Кем йәки нимәгәләр ҡаршы ятҡан урын, кем йәки нимәнеңдер турыһы; тапҡыр. *Һәр өй тәңгәлендә бәпкәләре етеп*

*бөткән ҡаҙ көтөүҙәре ята.* З. Биишева. *Аҡназаров клуб тәңгәленә еткәс туҡтаны.* Ә. Вәли. / Һүҙ ағышындағы билдәле бер урын. *Хәбәрҙең ошо тәңгәленә еткәс, Бәхреямал әбей .. ҡалҡына биреп ҡуйҙы.* Ш. Янбаев.

**2.** Урын-ваҡыт килеш аффиксы менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*кар.* **тәңгәлдә, тәңгәлендә**).

**ТӘҢГӘЛ**[2] **1.** Ниҙеңдер тапҡырына ҡарай тура йүнәлешле; тура. *Тәңгәл юл.* // *Тәңгәл барыу. Тәңгәл күтәрелгән төтөн.*

**2.** *күҫ. мәғ.* Урын, ваҡыт йәки эш-хәрәкәт теүәллеген, тапҡырлығын белдерә; нәҡ. *Ерҙең тәңгәл уртаһы. Тәңгәл таң алдынан. Эштән тәңгәл бөтөүенә килеү.*

□ **Тәңгәл булыу** (*йәки* **килеү**) *һөйл.* тура килеү, тап булыу. *Айыу тәңгәл булды.*

♦ **Тәңгәл һүҙле** *һөйл.* асыҡтан-асыҡ әйткән, тура һүҙле.

**ТӘҢГӘЛДӘ** *бәйл. функцияһында* Күрһәтеү алмаштарынан һуң килеп, эш-хәлдең, берәй мәсьәләнең нимәгәлер бәйле булыуын белдерә. *Алмагастар ултырттыҡ. Был тәңгәлдә бар эшебеҙ кәнт Мичуринса сыҡты.* С. Кулибай.

**ТӘҢГӘЛЕНДӘ** *бәйл. функцияһында һөйл.* Төп килештәге һүҙҙәрҙән һуң килеп, эш-хәлдең, мәсьәләнең нимәгәлер бәйле булыуын белдерә; тураһында. *Әйтер һүҙе бар ине уның [әбейҙең]. Йорт-ҡура, мал-тыуар тәңгәлендә лә әйтеп ҡалдырырға кәрәк.* К. Мәргән.

**ТӘҢГӘЛЕҮ** *ҡ. һөйл.* Тура килеү, осрау. *Айыуға тәңгәлеү.*

**ТӘҢГӘЛЛӘҮ** *ҡ.* Кем йәки нимәгәлер турылап йүнәлтеү. *Ауылға тәңгәлләп барыу.*

**ТӘҢГӘЛЛӘШЕҮ** *ҡ.* Кемдең йәки ниҙеңдер тәңгәленә, турыһына, ҡаршыһына килеү. *Алда барыусылар менән тәңгәлләшеү.*

**ТӘҢГӘЛТЕҮ** *ҡ. һөйл.* Тап килтереү, юлыҡтырыу. *Бәләгә тәңгәлтеү.*

**ТӘҢКЕМ** *р. диал.* Гел, һаман.

**ТӘҢКЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. кар.* **тәңкләү**. *Тәңкләнгән кейем.*

**ТӘҢКЛӘҮ** *ҡ.* Таҫлап, тигеҙләп бөкләү. *Тәңкләп ҡуйыу. Тәңкләп өйөү.* ■ *Яңы кейемдәремде әсәйем такта сумаҙанымдың төбөнә тәңкләп һалды.* Ш. Янбаев.

**ТӘҢКӘ** *и.* **1.** Йөҙ тингә торошло аҡса берәмеге; һум. *Ҡағыҙ бер тәңкә. Биш тәңкә. Илле тәңкә.* / Бер һумлыҡ көмөш йәки алтын аҡса. *Алтын тәңкә.* ■ *Француз яулыҡ алдым тәңкәгә, бәхетем юғы тейҙе теңкәгә* (Халыҡ йырынан).

**2.** Төрлө көмөш аҡса. *Ун тинлек тәңкә.*

**3.** Ҡатын-ҡыҙҙың кейеменә, сәсенә төрлө көмөш аҡсанан йәки йылтыр ҡалайҙан тишеп таҡҡан биҙәүес. *Көмөш тәңкә. Шау көмөш тәңкәнән торған һакал. Сулпы тәңкәһе. Тәңкә баҫыу.* / *күсм.* Нимәнеңдер йымылдап уйнауына ҡарата әйтелә.*Көмөш тәңкәләр уйнатып тулҡына көмөш күлдәр.* Р. Ниғмәти.

**4.** Балыҡтың тәнен ҡаплаған түңәрәк ваҡ ҡабырсаҡтар рәүешендәге йылтыр йоҡа мөгөҙ матдә. *Ваҡ тәңкәле балыҡ.* ■ *Хөсәйен .. сыртанды таҙарта башланы. Бармаҡ башындай эре тәңкәләре уның тирә-яҡҡа сәсрәй.* Р. Ғабдрахманов.

♦ **Сәс тәңкә** *кар.* **сәстәңкә. Талир тәңкә** *кар.* **талир. Тәлмәрйен тәңкәһе** *кар.* **тәлмәрйен. Тәңкә алыу** ат өҫтөндә сабып килгән ыңғайҙа ерҙәге тәңкәне алыуҙан торған бәйге ярышы. **Тәңкә сулпы** сулпылы сәсүргес. **Тәңкә сыбар** *кар.* **сыбар** 1. **Тәңкә ташлау** *шул уҡ* **һыу башлау** (*кар.* **һыу**). **Тәңкә үләне** *диал.* бесәй табаны (*кар.* **бесәй**). **Тәңкә һалыу** егеттең ҡыҙ йортонда тәү тапҡыр йыуынғанда, ашағанда һауыт төбөнә һалып аҡса ҡалдырыу йолаһы.

● *Йөҙ тәңкә аҡсаң булғанса, йөҙ дуҫың булһын.* Мәҡәл.

**ТӘҢКӘЛЕ** *с.* Тәңкә (3 мәғ.) менән биҙәүле. *Тәңкәле елән. Тәңкәле елкәлек. Тәңкәле һырға. Тәңкәле беләҙек.*

**ТӘҢКӘЛЕК** *и.* Билдәле бер тәңкәгә торошло, билдәле бер тәңкә иҫәбендәге. *Ун тәңкәлек аҡса. Илле тәңкәлек тауар.* ■ *[Бай:] Нәмәһенә гауга күтәрәһегеҙ? Бер тәңкәлек алтынға йөҙ тәңкәлек тауыш!* Я. Хамматов.

**ТӘҢКӘЛӘҮ** *ҡ.* Тәңкә (3 мәғ.). тағып биҙәү, тәңкә баҫыу. *Тәңкәләп елән тегеү.*

**ТӘҢКӘСҮҠ** *и. диал. кар.* **сулпы** [2].

**ТӘҢРЕ** *и.* **1.** Дини ҡарашса, донъяны бар иткән юғары зат; алла, хоҙай. *Мине юҡтан бар иткәнһең, тәңрем, ни гонаһым өсөн яраттың, яраттың да, тик зар, ҡайғы биреп, бай-муллаңдан мине ҡарғаттың.* Ҡ. Даян./ *күсм.* Кемдер табынған кеше йәки нәмә. *Баҙар королдәре! Һеҙ табынған алтын-көмөштәрҙе тәңре итеп [шагир] үҙенә алалмай.* С. Агиш.

**2.** *кит.* Күк йөҙө, күк көмбәҙе.

● *Күрше хаҡы — тәңре хаҡы.* Мәҡәл. *Тәкә мөгөҙө тәңрегә теймәҫ.* Мәҡәл.

**ТӘҢӘРЛӘҮ** *ҡ. диал.* Тәгәрләү.

**ТӘҢӘРӘҮ** *ҡ. диал. кар.* **тәгәрәү** 1, 2.

**ТӘП-** *күҫ.* Тә- ижеге менән башланған төп сифат йәки рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһен бирә. *Тәп-тәмһеҙ. Тәп-тәпәшәк.*

**ТӘПЕ**[1] *и.* **1.** Йәнлекте һуғып ҡыҫыу өсөн таҡтаға ултыртҡан дуға рәүешендәге ау ҡоралы. *Сысҡан тәпеһе. Төлкө тәпеһе. Тәпе ҡороу.* ■ *[Терпе:] Тәпегә һинең кеүек иҫәр сысҡандар ғына эләгә ул.* Ж. Кейекбаев./ Эре йәнлекте ҡыҫып тотор өсөн һағайтып ҡуйған бүрәнә рәүешендәге ау ҡоралы. *Айыу тәпеһе. Бүре тәпеһе.*

**2.** *диал. кар.* **титес** 1.

**3.** *диал.* Тәте.

**ТӘПЕ**[2] *и. диал. кар.* **тырнаҡ** 4. *Культиватор тәпеһе.*

**ТӘПЕЙ** *с. диал.* **1.** Телдәр.

**2.** Йәтешләп, күңел биреп эшләүсән; бөтмөр.

**ТӘПЕЙЛӘҮ** *ҡ. һөйл.* Бөтмөрләү, тәпсирләү. *[Нәзифә] оҙаҡ итеп, тәпейләп ҡашағаяғын йыуҙы, иҙәнен һөртөп алды.* Н. Мусин.

**ТӘПЕҮ** *ҡ. кар.* **тәпәү**.

**ТӘПЕШ** *и. диал.* Ярты бот һыйышлы ағас һауыт; бәләкәй тәпән.

**ТӘПКЕ** [*рус.* тяпка] *и.* **1.** Арҡыры башлы көрәк рәүешендәге ер йомшартҡыс ҡорал; кәтмән. *Тәпке менән картуф күмеү. Тәпке менән утау.*

**2.** Сапҡылап, ит-йәшелсә тураҡлай торған

бәләкәй айбалта рәүешендәге үткер ҡорал. *Кәбеҫтәне тәпке менән тапау.*

**ТӘПКЕЛӘҮ** *к.* Тәпке (1 мәғ.) менән эшкәртәү. *Сөгөлдөр тәпкеләү.*

**ТӘПСИРЛӘҮ** *к.* Бөтә нескәлектәренә иғтибар итеү; ентекләү, бөтмөрләү. *Тәпсирләп һөйләү. Тәпсирләп эшләү.* ■ *[Сәгүрә] киң өҫтәлдәге ҡиммәтле йыһаздарҙы .. тәпсирләп һөрт [тө].* Ф. Иҫәнғолов.

**ТӘП-ТӘП** *оҡш.* Йүгереп йөрөгән балалар аяғының тауышын белдергән һүҙ. **Тәп-тәп баҫыу** (*йәки* **атлау**) йөрөй башлау, атлау (балаға ҡарата).

**ТӘПШЕ** *и. диал.* **1.** Һелкәүес.

**2.** Ялғаш.

**ТӘПӘЙ** *и.* Ҡоштарҙың һәм тырнаҡлы йәнлектәрҙең аяғы. *Айыу тәпәйе. Бесәй тәпәйе. Ҡаҙ тәпәйе.*/ *кусм.* Сабый баланың аяғы. *[Салауат] йомшаҡ кескәй ҡулдарын, тәпәйҙәрен йүргәк аҫтынан сығара.* З. Биишева. **Ялан тәпәй** аяҡҡа бер ни киймәй; ялан аяҡ.

♦ **Тәпәй баҫыу** (*йәки* **тороу**) аяҡҡа баҫыу, тороу (балаға ҡарата). *Мин тотонop тәпәй баҫкан .. тал да инде ниндәй бейек.* Р. Назаров. **Тәпәй йөрөү** атлау (балаға ҡарата).

**ТӘПӘЙЛӘТЕҮ** *к. һөйл.* Йәйәү атлатыу. *Тәпәйләтеп алып барыу.*

**ТӘПӘЙЛӘҮ** *к.* **1.** Үҙ аяғы менән йөрөү (балаға ҡарата). *Бала тәпәйләй башланы.*

**2.** Йәйәү атлау. *Тәпәйләп барыу.*

**ТӘПӘК** *с. диал.* Тәпәшәк.

**ТӘПӘЛДЕРЕК** *и. диал. кар.* **табалдырыҡ** 2.

**ТӘПӘЛӘҮ** *к.* Бәреп-һуғып туҡмау. *Тәпәләп алыу. Тәпәләп ташлау.* ■ *Тәпәскә «Тәпәлә, тәпәс!» — тип әйтһәң, хәҙер тәпәләп алып китер* (Әкиәттән).

**ТӘПӘЛӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **тәпәләү.** *[Миңлебай Хәтирәгә] берәйһенең бәйләнеүен күрһә, үҙен-үҙе онота ул. Хатта тәпәләшергә лә тартынмай.* Р. Ғабдрахманов.

**ТӘПӘН** *и.* **1.** Бал, май кеүек нәмә һалыу өсөн йыуан ағастың эсен соҡоп яһаған тәпәшәк һауыт. *Оло тәпән.* ■ *Кустәнәсһеҙ барыу килешмәй, тип, Илмырҙа ҡарт тәпәнгә бал тултырып алды.* Ә. Вәли./ Шул һауытҡа тиң үлсәү берәмеге. *Бер тәпән май.*

**2.** *диал.* Көрәгә.

● *Майлы тәпән тышынан билдәле.* Мәҡәл.

**ТӘПӘНАУЫҘ** *и. диал.* Бегемот.

**ТӘПӘНЛӘҮ** *р.* Күп итеп, тәпәндәр менән. *Тәпәнләп май тоҙлау.*

**ТӘПӘРЕШ** *и. диал. кар.* **төпөш** [2].

**ТӘПӘРЛӘНЕҮ** *к.* һөйл. Бөтәрләнеү, ныҡ таушалыу. *[Ғабдулланың] өҫ-башы рәтләп ҡарал-маны, һәр саҡ бысраҡ, тәпәрләнгән булды.* Д. Исламов.

**ТӘПӘРЛӘҮ** *к. һөйл.* Бөтәрләү, таушалдырыу. *Кейемде тәпәрләү.*

**ТӘПӘС** *и.* Оҙон һапҡа тағылған туҡмаҡ рәүешендәге элекке ашлыҡ һуҡҡыс ҡорал. *Тәпәс менән ашлыҡ һуғыу.* ■ *Башҡортостандың төньяғында һәм төньяҡ-көнбайышында урылған ашлыҡ тәпәс .. менән, көньяҡта — малдан тапатыу юлы менән һуғыла.* Р. Кузеев, Б. Юлдашбаев.

**ТӘПӘСЛӘҮ** *к.* Тәпәс менән һуғыу (ашлыҡты). *Бойҙай тәпәсләү. Тары тәпәсләү.*

**ТӘПӘҮ** *к.* **1.** *һөйл.* Үткер ҡорал менән сапҡылау; тапау. *Ит тәпәү.*

**2.** *кусм.* Бер үк нәмәне ҡат-ҡат ныҡып әйтеү; туҡыу. *[Арыҫлан:] Шуны тәпәп тормаһа, башҡа әйтере юҡтыр, ахыры.* Ғ. Ибраһимов.

**ТӘПӘШ** *с.* Түбәндән юғарыға булған араһы бәләкәй; *киреһе* бейек. *Тәпәш өй. Тәпәш ҡойма. Тәпәш ултырғыс.* ■ *[Булат] ситтәндең тәпәш, тапалған урынын ҡалҡыуландырып, тишек ерҙәрен ямап та бөттө.* К. Кинйәбулатова./ Ҡыҫҡа буйлы; *киреһе* оҙон. *[Петя:] Минең буйға ҡарамағыҙ, тәпәш булһам да көслө мин.* Б. Рафиҡов.

**ТӘПӘШӘЙЕҮ** *к.* Бейеклеге кәмеү, тәпәшкә әйләнеү. *Тау тәпәшәйгән.* ■ *Көньяҡҡа .. табан ер өҫтө тәпәшәйә бара.* М. Хисмәтов.

**ТӘПӘШӘЙТЕҮ** *к.* Бейеклеген кәметеү, тәпәш итеү.

**ТӘПӘШӘК** *с.* Бейеклек үлсәме бәләкәй (ғәҙәттә сағыштырыу рәүешендә әйтелә). *Тәпәшәк өҫтәл. Тәпәшәк тау.* ■ *Тауҙың аҫтында .. салҡып ағып ятҡан матур йылға. Уның һулаҡай яры тәпәшәк.* Ғ. Дәүләтшин./ Ҡыҫҡа буйлы; тәбәнәк. *Тәпәшәк кеше.*

**ТӘПӘШӘКЛӘНЕҮ** *к. кар.* **тәпәшәйеү.** *[Элек] бик бейек күренгән яр бер тиклем тәпәшәкләнгән.* С. Агиш.

**ТӘРАЗУ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Үлсәү, бизмән.

**ТӘРАНДАР** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Көй яратыусы, моңло кеше. *Башҡорттарым беләһеҙме, кемдәрҙән һеҙ? Борон булып бик мәшһүр тәрандар һеҙ.* С. Яҡшығолов.

**ТӘРАНӘ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Моң, көй.

**ТӘРБИӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Тейешле тәртипкә, әҙәп ҡағиҙәләренә, эш күнекмәләренә өйрәтеүгә, аң белем биреүгә йүнәлтелгән эш. *Ғаилә тәрбиәһе. Мәктәп тәрбиәһе. Эстетик тәрбиә.* ■ *Тәрбиә балаға йәштән кәрәк.* М. Ғафури./ Шул эш һөҙөмтәһендә үҙләштерелгән аң-белем, әҙәплелек, культура кимәле, эхләҡи хәл. *Яҡшы тәрбиә алыу. Юғары тәрбиәгә эйә булыу. Тәрбиә етешмәү.* ■ *[Гөлнур:] Ауылда .. совет мәктәбендә белем, тәрбиә алған йәш уҡытыусыларға мохтажлыҡ ҙур әле.* М. Тажи.

**2.** Кемгәлер йәшәү шарттары булдырып, үҙ ҡулында аҫрау, бағыу эше. *Бала тәрбиәһе. Әсә тәрбиәһендә үҫеү. Ата тәрбиәһе күрмәү.* ■ *Әсәһе үлгәс.., Ҡанышбикә әбей Тимеркәйҙе үҙ тәрбиәһенә ал[ды].* Д. Юлтый./ Кем йәки нимәләр тураһында ҡайғыртып, уның йомошон хәстәрләү, уға ярҙам итеү, уны ҡарау эше. *Сирле кешегә яҡшы тәрбиә кәрәк. Мал тәрбиәһен яҡшы белгән кеше.* ■ *Беҙҙә .. аҫыл йылҡы малын ҡәҙерләй белмәйҙәр. Тәрбиә юҡ йүнләп.* Ж. Кейекбаев.

□ **Тәрбие итеү** (*йәки* **ҡылыу**) аҫрау, ҡарау.

**ТӘРБИӘЛЕ** *с.* **1.** Яҡшы тәрбиә алған, әҙәп белгән, тәртипле. *Тәрбиәле булыу.* ■ *Кейәү кеше бик аҡыллы, тәрбиәле, ҙур белемгә эйә икән.* Б. Бикбай.

**2.** Тейешле шарттар булдырылған, яҡшы ҡаралған. *Тәрбиәле тормошта йәшәү. // Тәрбиәле тороу.*/ Тәртиптә тотолған, ҡараулы. ■ *Бик тәр-*

*биәле булмә. Уң якта диван, .. шундай уҡ яҡшы креслолар.* И. Насыри.

**3.** Донъя көтөүҙә эш тәртибен белгән, оҫта эш иткән. *Аш-һыу тирәһенә бик тәрбиәле ҡатын ул Әскәп.* Б. Бикбай.

**ТӘРБИӘЛЕЛЕК** *и.* Тәрбиәле (1 мәғ.) булыу сифаты. *Ҡайҙан килә кешегә шундай тәрбиәлелек? Һинең менән ҡул бирешеп күрешер, хәл-әхүәлде һорашыр. Йылмайып өндәшер ул.* М. Кәримов.

**ТӘРБИӘЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **тәрбиәләү** 1, 2. *Балалар йортонда тәрбиәләнеү.*

**ТӘРБИӘЛӘНЕҮСЕ** *и.* Балалар йортонда, баҡсаһында йәки интернатта һ. б. тәрбиә алыусы бала, үҫмер.

**ТӘРБИӘЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **тәрбиәләү** 1, 2. *Бала тәрбиәләтеү.*

**ТӘРБИӘЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Тейешле тәртипкә, әҙәп ҡағиҙәләренә, эш күнекмәләренә өйрәтеү, аңбелем биреү. *Коммунистик рухта тәрбиәләү.* ■ *Йәш быуынды .. ата-бабаның иң яҡшы традициялары нигеҙендә тәрбиәләргә кәрәк.* Р. Бикбаев, Р. Шәкүров./ Кешенең аңына, тәбиғәтенә йоғонто яһау, ниндәйҙер эшкә, ғәҙәткә күнектереү. *Эшкә һөйөү тәрбиәләү. Баҫынҡылыҡ тәрбиәләү. Яуаплылыҡ хисе тәрбиәләү.*

**2.** Кемгәлер йәшәү шарттары булдырыу, үҙ ҡулында тотоу; аҫрау, ҡарау. *Тәрбиәләп үҫтереү. Сабый саҡтан тәрбиәләү. Олоғайғас тәрбиәләү.* ■ *Атайым гүмер буйы кешегә эшләп, алты бала тәрбиәләне.* Т. Йәнәби./ Кем йәки нимәләр тураһында ҡайғыртып тейешле шарттар булдырыу, төрлө ярҙам, хәстәрлек күрһәтеү; ҡарау. *Мал тәрбиәләү. Ауырыуҙы тәрбиәләү.* ■ *Фәһимә бушай алмай, уҡыу ҙа, өй эше, бала, ир тәрбиәләү байтаҡ ваҡытты ала.* С. Агиш. *Ағасты ултыртыу ғына етмәй. Үҫһен, емеш бирһен өсөн уны тәрбиәләргә кәрәк.* М. Тажи.

**3.** Тейешле талапҡа, шартҡа килтереп, хәстәрләү. *Аш тәрбиәләү.*

**ТӘРБИӘЛӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **тәрбиәләү**. *Балалар тәрбиәләшеү. Мал тәрбиәләшергә ярҙам итеү.*

**ТӘРБИӘСЕ** *и.* Тәрбиә эше менән шөғөлләнгән кеше. *Балалар тәрбиәсәһе. Ата-әсә баланың беренсе тәрбиәсеһе.* ■ *Тәрбиәсе белем кимәле яғынан да, ҡылығы менән дә йәш эшсе өсөн өлгө булырға тейеш.* Ф. Мөхәмәтйәнов.

**ТӘРБИӘҮИ** [*ғәр.*] *с.* Тәрбиә биреүгә, тәрбиәләүгә мөнәсәбәтле. *Тәрбиәүи эш. Хеҙмәт — бик ҙур тәрбиәүи көс.*

**ТӘРБИӘҺЕҘ** *с.* **1.** Әҙәп, тәртип ҡағиҙәләренә буйһонмаған, насар тәрбиәләнгән. *Тәрбиәһеҙ бала.* ■ *[Мулла:] Тәрбиәһеҙ, холоҡһоҙ .. [ҡатын] арҡаһында яҡшылар, ил аҙаматтарына ҡатнашыуҙан айырылдым.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Донъя көтөүҙә эш тәртибен белмәй, теләһә нисек эш итеүсән. *Аш-һыуға тәрбиәһеҙ ҡатын.*

**ТӘРБИӘҺЕҘЛЕК** *и.* Тәрбиәһеҙ булыу сифаты. *Тәрбиәһеҙлектән килгән ҡыланыш.*

**ТӘРГӘ** *и.* Ҡорот киптереү өсөн ваҡ ҡына таҡталарҙан ҡоршап бәйләп эшләнгән нәмә; ылаш.

**ТӘРЕ**[1] *и.* **1.** Христиандарҙың арҡысаҡ рәүешендәге табыныу әйбере, дин символы. *Алтын тәре. Муйынға тәрә тағыу.*

**2.** Христиандар табынған изгеләр һүрәте. *Тәрегә ҡарап суҡыныу.* ■ *Уҡына-уҡына ҡарап төртөнәләр алтынланған тәреләренә.* М. Ғафури.

◆ **Ҡарт тәре** эрләгәндә әйтелә. **Ҡыҙыл Тәре** медицина эшенә бәйле булғанды белдәргән тамға. *Ҡыҙыл тәреле сумка таҡҡан санитарҙар .. яралы кешеләрҙе йыйыштыралар ине.* С. Ханов.**Тәре бағанаһы** турыға ҡатып, тик торған кешегә асыуланып әйтелә.

**ТӘРЕ**[2] *бәйл. диал.* Тиклем, саҡлы. *Өйгә тәре.*

**ТӘРЕМ** *бәйл. диал.* Тиклем, саҡлы. *Төшкә тәрем.*

**ТӘРЖЕМАН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тәржемәсе, тылмас.

**ТӘРЖЕМӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Бер телдән икенсе телгә әйләндереү эше. *Тәржемә менән шөғөлләнеү.*

**2.** Бер телдән икенсе телгә әйләндерелгән яҙма, текст. *Китаптың тәржемәһе. Мәҡәләнең рус теленә тәржәмәһе.*

□ **Тәржемә итеү** бер телдән әйтелгән, яҙылғанды икенсе тел саралары менән биреү. *Башҡортсаға тәржемә итеү.* ■ *Тимашев .. Байгужаға бәйләнә: — Ни әйттең? Ни һөйләйһең, руссаға тәржемә ит әле! — ти.* Д. Юлтый.

**ТӘРЖЕМӘИ** [*ғәр.*]: **тәржемәи хәл** кемдеңдер ғүмер, тормош юлы; биография. *Тәржемәи хәлде һөйләү.*

**ТӘРЖЕМӘЛӘҮ** *ҡ.* Бер телдән икенсе телгә күсереү, тәржемә итеү. *Әҫәрҙе тәржемәләү.* ■ *[Билал] ҡаҙаҡтарҙың Төҙтүбә яғындағы разъезды «Ҡыҙыл уй» тип атауҙарын .. тәржемәләне.* А. Таһиров.

**ТӘРЖЕМӘСЕ** *и.* Тәржемә итеүсе; тылмас. *Тәржемәсе булып эшләү.* ■ *Тәржемәсе .. ижад итеүсе кеше, авторҙың бирергә теләгән бөтә төр нескәлектәрен үҙ тулылығында күрһәтә алыусы тел оҫтаһы.* Ә. Харисов.

**ТӘРЖИХ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Өҫтөнлөк.

□ **Тәржих ҡылыу** өҫтөн итеү. *Жөнүд шаятинды тәржих ҡылып, унан һуң беҙҙе хоҙай ормаҡ кәрәк.* Акмулла.

**ТӘРИКӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Мираҫ. *[Ҡарт] өс улын саҡырып алып, тәрикә әйткән* (Әкиәттән).

**ТӘРИҠӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Изгеләргә килтергән дини йүнәлеш, суфыйлыҡ юлы. *Тәриҡәттә суфый үҙенең .. бөтә төр шәхси теләктәренән баш тартырға тейеш.* Ә. Харисов.

**ТӘРИЛКӘ** [*рус.* тарелка] *и.* **1.** Йәйенке һай һауыт; таштабаҡ. *Таш тәрилкә. Тимер тәрилкә. Ваҡ тәрилкә. Ҙур тәрилкә.* ■ *Тайба әбей һәр кемдең тәрилкәһенә .. ит өлөштәре бүлеп һалды.* З. Биишева. **Күбәләк тәрилкә** *диал.* бәләкәс тәрилкә./ Өҫтәлгә килгән ашамлыҡ иҫәбен белдерә. *Бер тәрилкә аш.* ■ *Өҫтәлгә .. ике тәрилкә икмәк ҡырҡып килтерҙеләр.* Д. Юлтый.

**2.** Сипарат барабаны эсендәге ҡатлы-ҡатлы түңәрәк тимер.

◆ **Тәрилкә тотоу** ярамһаҡланыу. **Тәрилкә ялау** ярамһаҡланып, кеше ыңғайына йөрөү.

*Ҡәүи мәғзүм — Өфөләге байҙар тәрилкәһен ялап, шуларҙың мәнфәғәтен алға һөргән .. бер бәндә.* Һ. Дәүләтшина.

**ТӘРИТЛӘҮ** *к.* Бейеү көйөн һүҙһеҙ таҡмаҡлау. *Тәритләп бейетеү.*

**ТӘРК** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кем йәки нимәләр ташланыуы, ҡалдырылыуы.

□ **Тәрк итеү** ҡалдырыу, ташлау. *Хурлыҡтыр .. кәсепте тәрк итеп, эшһеҙ ятыуҙар* (Бәйеттән).

**ТӘРҠИБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һүҙ теҙмәһе, һүҙ бәйләнеше. *[Хәлфә] «Әлхәмдөнең» тәркибен өр-яңынан башлап тағы ла әйрәтте.* М. Ғафури.

**ТӘРМӘШЕҮ** *к. диал.* Тырмашыу.

**ТӘРПӘШ** *с. диал. кар.* **тарбаҡ**[1]. *Тәрпәш ағас.*

**ТӘРСИМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һүрәт, һыҙма төшөрөү эше.

□ **Тәрсим итеү** (*йәки* **ҡылыу**) 1) һүрәт, һыҙма төшөрөү. *Ҡуй бумалаңды, мосауир, тәрсем итмә.* Б. Мирзанов; 2) һүрәтләү. *Ул [яҙыусы] Гөлбикәне нәфис буяуҙар менән тәрсим иткән.* Д. Юлтый.

**ТӘРТЕШКӘ** *и.* Мейес ҡуҙын болғата торған кәкре башлы, оҙон һаплы тимер; болғауыс.

**ТӘРТИП** *и.* **1.** Талаҡа ярашлы таҙа, төҙөк булған, йыйнаҡ, яҡшы хәл. *Булмәлә тәртип юҡ. Юл тәртипкә килтерелде* ■ *Улар калала гәҙәттә була торған тәртипте күрмәне.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Эштә, тормошта урын алған билдәле бер ҡағиҙә, закон рәүешендә ҡуйылған норма. *Иске тәртип. Тәртипкә буйһоноу.* ■ *[Ғәйшә] больница тәртибен боҙоп ҡыҫҡырып көлдө.* С. Агиш. *Кис менән ҡаҙарма тәртибе боҙолдо.* Д. Юлтый. / Ижтимағи ҡоролоштағы система. *Ауылда иҫке тәртип урынлаштырыла башлай.* И. Нигмәтуллин.

**3.** Нимәнеңдер ҡуйылышындағы, торошондағы билдәле бер система *Алфавит тәртибе. Ағастарҙы шахмат тәртибендә ултыртыу. Вакиғаларҙы хронологик тәртиптә биреү.*

**4.** Берәй нәмәнең барышындағы, бирелешендәге эҙмә-эҙлелек. *Тәртипкә килтереү. Тәртип менән ҡуйыу.* ■ *Һөйләй Сәйҙел, тәртибе юҡ ләкин һүҙенең.* Ғ. Сәләм. *Юлай өҫтө-өҫтөнә яуған һорауҙарҙы бер тәртипкә теҙергә тырышты.* З. Биишева.

**5.** Ниҙәләр башҡарыу, үтәү алымы, ҡағиҙәһе, ысулы. *Уйындың тәртибе. Эштең тәртибе. Йәшерен һайлау тәртибе. Йыйылыш тәртибе.* ■ *Мин Мөжәһиткә камыр баҫыуҙың тәртибен өйрәтәм.* Т. Йәнәби.

**6.** Йәмғиәттәге, коллективтағы бөтә кеше өсөн мәжбүри булған әҙәп, әхлаҡ ҡағиҙәләре. *Йәмғиәт тәртибе. Тәртипкә күндереү. Ныҡлы тәртип урынлаштырыу.* ■ *Тел белеп, аҡыл керә башлағандан һуң, әҙәп, тәртип өйрәтегеҙ балағыҙға.* М. Ғафури. **Тәртип боҙоу** тәртипһеҙлек эшләү, әҙәп, әхлаҡ ҡағиҙәләрен боҙоу./ Ошо ҡағиҙәләргә ярашлы ҡылыҡ. *Уҡыусы балалар тәртибе. Тәртип буйынса баһалау.* ■ *Сәгиҙә, һинең класыңда тәртип шәптән түгел икән.* М. Тажи.

□ **Тәртип итеү** (*йәки* **ҡылыу**) *иҫк.* ҡороу, төҙөү. *Неплюев .. бер полк ғәскәр ҙә тәртип ҡылып ҡуйҙы.* М. Һаҙыев.

◆ **Көн тәртибе** *кар.* **көн.**

**ТӘРТИПЛЕ** *с.* **1.** Үҙен-үҙе тотоуҙа дөйөм ҡағиҙәгә буйһонған, яҡшы ҡылыҡлы. *Тәртипле бала. Тәртипле булыу. // Үҙеңде тәртипле тотоу.*

**2.** *р. мәғ.* Билдәле бер система менән, эҙмә-эҙлелекте һаҡлап. *Йыйылышты тәртипле алып барыу.* ■ *Ҡапыл килеп тығылған төрлө эш тәртипле рәүештә эш алып барарға ирек бирмәй.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТӘРТИПЛЕЛЕК** *и.* Тәртипле (1 мәғ.) булыу сифаты.

**ТӘРТИПЛӘҮ** *к. һөйл.* Тәртипкә килтереү. *Өҫтәл-ултырғыстарҙы тәртипләп урынлаштырғас, йорт эсе йыйнаҡ төҫ алды.* С. Агиш.

**ТӘРТИП-НИЗАМ** *и. йыйн.* Эш, тормоштағы төрлө тәртип. *Мостафа .. ата-әсәһенән тормоштоң тәртип-низамдарына төшөнә бара, өгөт-нәсихәттәрен үҙләштерә.* Ғ. Хөсәйенов.

**ТӘРТИПҺЕҘ** *с.* **1.** Тейешле талапты үтәмәгән, дөйөм ҡағиҙәгә буйһонмаған, насар ҡылыҡлы. *Тәртипһеҙ бала. Тәртипһеҙ уҡыусы. Тәртипһеҙ булыу. // Тәртипһеҙ ҡыланыу. Үҙеңде тәртипһеҙ тотоу.*

**2.** Тейешле тәртипте (3, 4 мәғ.) һаҡламаған, буталсыҡ. *Тәртипһеҙ эш.* ■ *Ғәскәрҙәр тәртипһеҙ рәүештә сигенә башланы.* Д. Юлтый.

**ТӘРТИПҺЕҘЛЕК** *и.* **1.** Дөйөм ҡағиҙәгә буйһонмаған насар ҡылыҡ. *Ололәр менән ҡаршы әйтешеп, тәртипһеҙлек күрһәтеү. Тәртипһеҙлек өсөн шелтә алыу.*

**2.** Тейешле тәртип (1 мәғ.) булмаған, йыйнаҡлыҡ етешмәгән насар хәл. *Бүлмәлә тәртипһеҙлек хөкөм һөрә — әйберҙәр теләһә ҡайҙа ята.*

**3.** Тейешле тәртип (3, 4 мәғ.) һаҡланмаған насар буталсыҡ хәл. *Магазиндағы тәртипһеҙлектәр тураһында берәү ҙә (һөйләмәне).* С. Агиш.

**4.** Халыҡтың экономикаға, политикаға бәйле ризаһыҙлыҡ белдергән сығышы, революцион характерҙағы хәрәкәт. *[Полковник:] Бөгөн .. һеҙ, фронттарҙа ҡаһарманлыҡ күрһәткән һалдаттар, бында, иҫке тәртипһеҙлектә баҫыуҙа .. юғалып ҡалдығыҙ.* Д. Юлтый. *[Пристав:] Маштакова туташ, һеҙ был башҡорттарҙың бындай тәртипһеҙлек сығарып, .. иген талап йөрөүҙәренә нисек ҡарайһығыҙ? — тине.* Һ. Дәүләтшина.

**ТӘРТИПҺЕҘЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Тәртипһеҙгә (1 мәғ.) әйләнеү. *Тәртипһеҙләнеп китеү.*

**2.** Тәртипһеҙ ҡыланыу. *Тәртипһеҙләнеп йөрөү.*

**ТӘРТНӘ** *и. диал.* Бәләкәй сана.

**ТӘРТӘ** *и.* Арба-сананың екке малды егә торған оҙон ағасы. *Арба тәртәһе. Сана тәртәһе. Тәртә башы. Тәртә бөгөү. Тәртә һыныу.* ■ *Тәртәне өр-яңынан ҡайтарып, атты еккеләгәнсе.., донъя шаҡтай ҡараңғыланды.* Ғ. Ғүмәр. **Тәртә төбө** тәртәне сана тояғына беркеткән тоҡан бау.

◆ **Ерек тәртә** үпкәсел, үсексән кешегә ҡарата әйтелә. **Тәртәне үҙеңә шаҡарыу** эште, һүҙҙе үҙ файҙаңа бороу. *Тайба әкренләп тәртәне үҙ яғына шаҡара башлай: «Атайымдарға күсеп ҡайтайыҡ та ҡуйайыҡ»,— ти.* Б. Бикбай. **Тәртәнән сығыу** йәшәп килгән тәртипте боҙоу, буйһонмай башлау. *[Өммиә — Зөбәйҙәгә:] Бөтөнләй тәртәнән сыҡтың. Китап та театр. Донъя мәшәкәттәрен бар тип тә белмәйһең.* Ғ. Әхмәтшин. **Тәртәһе ерек** (*йәки* **ҡыҫҡа, мурт**) *кар.* **ерек тәр-**

тә. *Әхмүш колас кереп йәшәргә ярата, мактаныңмы — ирей ҙә китә, сак кына каршы килдеңме, тәртәһе ерек — кылтая ла куя.* Б. Бикбай. *Бармай калырға ярамай.. Батшаның тәртәһе кыҫка* (Әкиәттән).

**ТӘРҮӘХ** [*ғәр.*] *и. кар.* **тәрәүех.**

**ТӘРӘДДЕД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Икеләнеү тойғоһо. *Һәр минут кермәктә йөҙ меңләп тәрәддәд куңеләмә.* Я. Юмаев.

**ТӘРӘКҠИ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Алға китеш, үҫеш; прогресс. *Йән эйәһенең миллиард йыллык тәрәккийенән һуң кеше айырылған.* И. Насыри.

□ **Тәрәкҡи итеү** алға китеү, үҫеү. *Донъяла һәр милләттең әхүәлдәре алмашыныр, ғәһ вакыт итеп тәрәкки, ғәһ тәдәнниҙә улыр.* С. Яҡшығолов.

**ТӘРӘКҠИЛӘШЕҮ** *к. кит.* Үҫеп камилләшыу; алға китеү. *[Йомак] әле лә халык тормошондағы яңы күренештәрҙе үҙенсәлекле сағылдырып, һаман үҫеүен, тәрәккиләшеүен дауам итә.* К. Мәргән.

**ТӘРӘКҠИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Алға китеш, тәрәкки. *[Риза:] Хәҙер тәрәккиәт заманы. Башкорттарҙан да зыялылар сығырға вакыт, бик вакыт.* Б. Бикбай.

**ТӘРӘКҠИӘТЛЕ** *с. кит.* Прогрессив карашлы; алдынғы. *Тәрәккиәтле кеше.*

**ТӘРӘН** *с.* **1.** Өҫкө кимәлдән, өҫкө кырҙан төпкә тиклемге ара үлсәме ҙур булған; *киреһе* һай. *Тәрән баҙ. Тәрән сокор. Тәрән бураҙна. Тәрән һыу. Тәрән күл. Тәрән булыу. // Тәрәнгә сумыу. Тәрәнгә төшөү. Тәрәндә ятыу. Тәрәндән алыу. // Тәрән соҡоу. Тәрән һөрөү. Тәрән күмеү.* ■ *Улар тәрән үҙәк аша сыккас, бер түбәгә күтәрелде.* М. Тажи. *Аҫта, бик тәрәндә икһеҙ-сикһеҙ диңгеҙ күгәреп яткан.* З. Биишева. *Окоптар тәрән каҙылған.* Д. Юлтый./ Эскә, төпкә нык ингән, нык уйылып торған, сағыштырмаса батынкы булған. *Тәрән йыйырсык. Тәрән эҙ. Тәрән яра. Тәрән булып һырланып тороу.* / Калын катлам булып яткан, күп булған. *Тәрән кар.*/ Нык юғарыла яткан, күҙ күреме етмәгән (һауа бушлығына, күккә карата). *Тәрән бушлык.* ■ *Әхмәт һуҙылып яткан, күҙен терәп тәрән, киң күккә.* Ғ. Сәләм.

**2.** Алғы урындан нык ситтә торған, алыҫ булған. *Тәрән подпольеға күсеү. Тәрән тылда йәшәү. Урмандың тәрән төпкөлө.*

**3.** Бик нык алынған (һулыш, тынға карата) *Тәрән һулыш. Тәрән итеп тын алыу. // Тәрән көрһөнөү. Тәрән һулау.*

**4.** Йөрәктең, күңелдең төбөндәге, эске. *Йөрәктең иң тәрән ерендә уянған хис. // Тәрәндә яткан тойғо.* ■ *Ҡуҙыйкүрпәстең әсәһе [Маянһылыуҙың китеүен] тәрән сер итеп һаклай.* К. Мәргән. *Карттың һүҙҙәре йөрәктән, тәрәндән кайнап сығалар.* Д. Юлтый.

**5.** *күсм.* Эстәлеге менән бай, ныклы, төплө. *Тәрән акыл. Тәрән белем. Тәрән мәғәнә. // Тәрән белеү.* ■ *Ғилемем тәрән булғанғалыр, бер һүҙем булды әмер, күрҙем кәҙер.* Ш. Бабич.

**6.** *күсм.* Юғары дәрәжәле; бик көслә, нык. *Тәрән ихтирам. Тәрән кайғы. Тәрән тойғо. // Тәрән кисереү. Тәрән уйланыу.* ■ *Саналы кеше .. тәрән уйға батып, түбән карап тик кенә бара.* Ғ. Дәүләтшин.

**7.** *күсм.* Ғәмәлләнеше тулы кимәлдә булған. *Тәрән тынлык.* ■ *Сәгиҙә әбей тыныслап тәрән йокоға сумды.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Тәрәнгә инеү** (*йәки* **төшөү, ебәреү**) ентекле, етди, мөһим төҫ биреү.

**ТӘРӘНЛЕК** *и.* **1.** Нимәнеңдер өҫтөнән, кырынан аҫка тиклемге ара. *Тәрәнлекте үлсәү. Уртаса тәрәнлектә һөрөү.* ■ *Һыу алтмыш етмеш сажин киңлегендә, ә тәрәнлегенең иҫәбе юк ине.* Д. Юлтый.

**2.** Ер өҫтөнән тәрәндә яткан урын. *Улар [геологтар] Урал тәрәнлектәренә һөжүм башланы.* Д. Буракаев.

**3.** Тәрән (3—5 мәғ.) булыу сифаты, тәрән булған хәл. *Һыуҙың тәрәнлеге. Карҙың тәрәнлеге. Белем тәрәнлеге. Мәғәнә тәрәнлеге. Кисереш тәрәнлеге.*

**ТӘРӘННЕМ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Әкрен генә көйләгән көй, йыр. *Көйләмә хәсрәт көйөң һәр дәм колағымда гиҙә. Ил йөрәген гел генә моңдар тәрәннемдәр өҙә.* Б. Мирзанов.

**ТӘРӘНТЕН** *р. һөйл.* **1.** Төплө итеп, бөтә асылында. *Тормоштоң үҫеш закондарын тәрәнтен белмәү Бабичты аҙашыуҙарға килтерҙе.* Ә. Харисов.

**2.** *кар.* **тәрән** 1.

**ТӘРӘНӘЙЕҮ** *к.* **1.** Нимәнеңдер тәрәнлеге артыу, тәрәнгә (1 мәғ.) әйләнеү; *киреһе* һайығайыу. *Йылға тәрәнәйҙе. Йырғанак тәрәнәйгән. Маңлай йыйырсыктары тәрәнәйҙе.*

**2.** *күсм.* Иркенәйеү (һулыш, тын алыуға карата). *Тәрәнәйҙе һулыш, байыны рух, тағы ла артты йәшәү шатлығы.* Ғ. Әмири.

**3.** *күсм.* Нығыу, төплөгө әйләнеү. *Дуҫлык тәрәнәйҙе.* ■ *Яҙыусы карашының тәрәнәйеүе уның әҫәрҙәренең идея йүнәлешен билдәләй.* «Ағиҙел», 1965, № 8./ Етди, катмарлы төҫ алыу. *Тәрәнәйә .. ғүмер уткән һайын, ахыры.* Н. Нәжми.

**ТӘРӘНӘЙТЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **тәрәнәйтеү** 1. *Тәрәнәйтелгән сокор.*

**ТӘРӘНӘЙТЕҮ** *к.* **1.** Тәрәнлек (2 мәғ.) кимәлен арттырыу, тәрәнгә әйләндереү, тәрән итеү. *Сокорҙо тәрәнәйтеү. Баҙҙы тәрәнәйтеү.*

**2.** *күсм.* Етди төҫ биреү, тәрәнгә ебәреү. *Зөләйха эште һаман да тәрәнәйтергә тырышты, хат яҙа торғас, башымды катырып бөттө.* Т. Йәнәби.

**ТӘРӘП: тәрәп ағасы** *диал.* тәрәпләүес.

**ТӘРӘПЛӘҮ** *к.* Сүсте тәрәпләүес менән һукҡылау; кағыу. *Етенде тәрәпләү.*

**ТӘРӘПЛӘҮЕС** *и.* Сүсте һыҙыра-һыҙыра кағып, талкышынан таҙарта торған йока ялпак ағас; каккы.

**ТӘРӘҮЕХ** [*ғәр.*] *и. дини* Ураҙала киске намаҙға кушып укыла торған өҫтәмә намаҙ. *Тәрәүехтә моңланып тәсбих әйтеүҙәр кыскырып.* С. Яҡшығолов.

**ТӘРӘШ** *и.* **1.** Тарап иләүгә әҙерләнгән бер ус сүс шәлкеме. *Бәләкәй тәрәш. Оҙон тәрәш. Ике тәрәш етен. Өс тәрәш сүс.*

**2.** (*йәки* **тәрәш тарак**) Сүс тарай торған оҙон тешле, һаплы ағас тарак. *Саған тәрәш*

*тараҡ.* ■ *[Ҡыҙ:] Батша миңә өс шырпынан һоҫа, тәрәш, сүре яһатып бирһен* (Әкиәттән).

**ТӘРӘШЛЕ** *с.* **1.** Тәрәш итеп әҙерләнгән; шәлкемле. *Тәрәшле етен. Тәрәшле киндер.* ■ *[Үгәй инә] ҡыҙға бик күп тәрәшле сүс биреп, үҙ ҡыҙын эйәртеп китте, ти* (Әкиәттән).

**2.** *и. мәғ. диал. ҡар.* **тәрәш** 1. *Гөлбанат әбей иләп ултырған орсоғон тәрәшлегә сәнсеп, урынынан торҙо.* М. Ғафури.

**ТӘРӘШЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **тәрәшләү.** *Киндер тәрәшләтеү.*

**ТӘРӘШЛӘҮ** *ҡ.* Сүсте тарап, тәрәш-тәрәш итеп әҙерләү. *Етенде тәрәшләү.*

**ТӘРӘШТӘҮ** *и.* Сығырға уратылған оҙон епле, балыҡҡа оҡшатып яһаған ялтырауыҡлы эре ҡармаҡ; спиннинг. **Тәрәштәү һелкеү** тәрәштәү менән балыҡ тотоу.

**ТӘС** *окш.* Яланғас тәнгә йәки һыуға ус менән еңелсә һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Тәс итеп ҡалыу. Тәс итеп һуғыу.*

**ТӘСАДЕФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кемдеңдер көтмәгәндә осрауы, кем менәндер көтмәгәндә осрашыу. *Ғәжәп бер тәсадеф мине хайранға ҡалдырҙы.* З. Өммәти.

□ **Тәсадеф итеү** көтмәгәндә осрау, осратыу. *Был хәҙрәттәрҙең береһе миңә нумерҙа тәсадеф итте.* М. Ғафури.

**ТӘСАРРЫФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Идара хоҡуғы; хөкөм. *Староста үҙендә бик ҙур тәсаррыф барлығына ныҡ ышанған.* М. Ғафури.

**ТӘСАУУЫФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Суфыйлыҡ. *Бындағы шәкерттәрҙең бөтәһе ишанға мөрит булып, тәсауыф юлына кереп, тәсбих тартып йөрөй.* М. Ғафури.

**ТӘСБИХ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Алланы ололап ҡабат-ҡабат әйткән һүҙ. *[Әбей:] Аллам, үҙең һаҡла, раббым, әйткән тәсбихтарым хаҡына!* Р. Ниғмәти.

**2.** *ҡар.* **тиҫбе.** *Тәсбих тартыу.*

**ТӘСДИҠ** [*ғәр.*] *и.* Раҫлау һүҙе йәки тамғаһы. *Директор тәсдиғы.*

□ **Тәсдиҡ итеү** (*йәки* **ҡылыу**) дөрөҫләп тамға ҡуйыу, раҫлау. *Мин уның һүҙҙәрен баш ҡағып тәсдиҡ итеп кенә ултырам.* М. Ғафури.

**ТӘСЕЛДӘТЕҮ** *ҡ.* Тәс-тәс [1] иттереү. *Тәселдәтеп һуғыу.*

**ТӘСЛИМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ниҙеңдер тапшырылыуы.

□ **Тәслим булыу** бирелеү. *Дингә тәслим булыу.* **Тәслим итеү** (*йәки* **ҡылыу**) биреү, тапшырыу.

**ТӘСМИӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Атама, исем.

□ **Тәсмиә итеү** атау. *Венгрҙар үҙҙәрен мадъяр, төрөктәр мажар тип тәсмиә итә.* М. Һаҙыев.

**ТӘСМӘЛӘҮ** *ҡ. һөйл.* **1.** Ваҡ-ваҡ баҫып шәп атлау. *[Зифа] тәсмәләп килеп аяғына уралған улы менән ҡыҙын берәм-берәм күтәреп ятты.* Н. Мусин.

**2.** Һыу өҫтөнән ҡаҡсып-ҡаҡсып һикереү (йоҡа ташҡа ҡарата). *Тәсмәләп китеү.*

**ТӘСРИФ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **тәсаррыф.**

**ТӘСТЕРЛӘТЕҮ** *ҡ. диал.* Сәптерләтеү.

**ТӘСТЕРЛӘҮ** *ҡ. диал.* Сәптерләү. *Ситтә, һай урында ғына тәстерләй инек.* Р. Низамов.

**ТӘС-ТӘС** [1] *окш.* Ҡабат-ҡабат тәс иткән тауышты белдергән һүҙ.

**ТӘС-ТӘС** [2] *саҡ.* Ҡолон саҡырғанда әйтелә.

**ТӘСӘЙ** *и. диал.* Уйынсыҡ (ҡурсаҡтан башҡа). *Тәсәй уйнау.*

**ТӘҪЕЛ** *и. иҫк.* Яҡшы мөнәсәбәтте белдергән йылы һүҙ. *Ҡотлояр — Истебайҙың тәҫеленә риза булып тынысланды.* Һ. Дәүләтшина.

**ТӘҪЛӘҮ** *ҡ. ҡар.* **таҫлау.**

**ТӘҪ-ТӘҪ** *саҡ.* Һауғанда бейәне тынысландырыу өсөн әйтелә.

**ТӘТЕ** *и.* Атыу ҡоралының сирткесте ысҡындыра торған ырғаҡ рәүешендәге өлөшө. *Мылтыҡ тәтеһе. Тәтегә баҫыу.* ■ *Әкрәм наган тәтеһен баш бармағы менән тартып ҡараны.* А. Таһиров.

**ТӘТЕГӘС** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме (юрматыларға инә).

**ТӘТЕЛДӘК** *с.* Һүҙгә әүәҫ (балаға ҡарата); телдәр. *Бураниа үлгәндә .. ике йәшлек тәтелдәк ҡыҙ ине ул Зөлхизә.* З. Биишева.

**ТӘТЕЛДӘҮ** *ҡ.* Йыш-йыш әйтеп, өҙмәй һөйләү. *Тәтелдеге сығыу.* ■ *Ул [Гөльямал] гәҙиттәгесә тәтелдәп, .. үҙ хәбәрен һөйләп ултырҙы.* Ж. Кейекбаев.

**ТӘТЕЛДӘҮЕК** *и.* Оҙон ҡыҙыл аяҡлы, оҙон муйынлы, тура суҡышлы, һырты һарғылт көрән, ҡанаттары сыбар, күгәрсендән бәләкәйерәк һаҙ ҡошо.

**ТӘТЕМ** *и. һөйл.* Татлыҡай.

**ТӘТЕТЕҮ** *ҡ.* Кемгәлер өлөш сығарыу, биреү. *Баҙарсы ҡусҭәнәсте бигүк йомарт тәтетмәһе.., [балалар] мыҫҡыл һүҙҙәре әйтеп ҡала.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТӘТЕҮ** *ҡ.* Кемдеңдер өлөшөнә тейеү, эләгеү. *Һуғыш арҡаһында рәтле уҡыу тәтемәне.* Д. Исламов.

**ТӘТЕҮӘЛ** *и. ҡар.* **тәтелдәүек.**

**ТӘТКЕ** *и. диал.* Тейәк.

**ТӘТӘЙ** [1] *с.* **1.** *бал.* Ҡарауға матур, асыҡ биҙәкле. *Тәтәй таш. Тәтәй күлдәк. Тәтәй булыу.*

**2.** *күсм.* Матур итеп кейенергә, ҡупшыланырға яратҡан, эшкә һүлпән ҡараған. *Тәтәй егет.* ■ *Тәтәй ҡыҙ Сания: «Әллә ҡайҙа, йәһәннәм төбөндә ятҡан ауылға китеп, башымды юғалтыр хәлем юҡ» — тип талашты.* М. Тажи.

**3.** *и. мәғ.* Балалар уйната торған нәмә; уйынсыҡ. *Елка тәтәйҙәре. Тәтәй менән уйнау.* ■ *Ниндәй матур, Ләйлә, был тәтәйҙәр, ниндәй матур һинең ҡурсаҡтар.* Т. Арслан. / *күсм.* Тәнен һатып кәсеп иткән ҡатын.

**ТӘТӘЙ** [2] [*рус.* тётя] *и. диал.* Әсәйҙең һеңлеһе; апай.

**ТӘТӘЙЛӘНЕҮ** *ҡ. диал.* Сөсөләнеү.

**ТӘУАБИҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. ҡар.* **табиғ.**

**ТӘУАФ** [*ғәр.*] *и иҫк. кит.* Нимәлер тирәһендә әйләнеп, уратып йөрөш.

□ **Тәуаф итеү** (*йәки* **ҡылыу**) әйләнеп, уратып йөрөү. *[Хәсән] һыраханаларҙы, йәшерен урамдарҙы тәуаф ҡыла башланы.* Ә. Иҫәнбирҙин.

**ТӘҮ** *р.* **1.** Беренсе мәртәбә (ҡабатланған йәки ҡабатланасаҡ эш-хәл иҫәбендә). *Тәү барғанда. Тәү ишеткән кеүек. Тәү килгән саҡта. Тәү күргәндәй. Тәү тапҡыр.* ■ *Аҙнағолдоң тәү килеүе була был.* З. Биишева. *Врач тәү ҡарамаҡҡа бик һәйбәт булырға оҡшаған. Баҫалҡы ғына холоҡ-*

*ло.* Ш. Янбаев. **Тәү башлап** беренсе тапҡыр, башлап. *Миңә тәү башлап ҡалаға барыу ҙа бик ҡыҙыҡ тойолдо.* Т. Йәнәби. **Тәү башта** иң элек, тәүҙә. *Әйҙә, барайыҡ шунда тәү башта.* Д. Юлтый. / Беренсе булып, башта. *Тәү осраған кеше.* ■ *[Фәхри:] Трактор баҫҡан! — тип ҡысҡырҙы ла, күҙенә тәү салынған нәмәне.., һөйәүле торған тәртәне электереп, һыу буйына үҙгерҙе.* Б. Бикбай.

**2.** Ниндәйҙер эштән элек, башта; тәүҙә. *[Бабай] иң тәү һыу һорап алып эсте.* И. Насыри.

**3.** *с.' мәғ.* Беренсе булған, тәүге. *Үҙебеҙ менән алып ҡайтырбыҙ тәү емешен йәшлек гөлөнөң.* Ғ. Сәләм. / Урын-ваҡыт килешендәге ҡайһы бер һүҙҙәр менән эш-хәлдең башланған ваҡытын белдергән һүҙбәйләнеш яһай; тәүҙә. *Тәү мәлдә. Тәү осорҙа. Тәү саҡта яҡшы эшләне.* ■ *[Бала эсәһен] тәү арала һорашҡылай торғайны, хәҙер бик теләгә лә алмай.* Б. Бикбай.

**ТӘҮБӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ярамаған эш-ҡылыҡ өсөн алла ҡаршыһында белдерелгән үкенес һүҙе. *Тәүбә әйтеү.* ■ *Һәр кеше: «Аҡтыҡ сәғәт, ләхәүлә,— ти, ярлыҡа, я алла, тәүбә, тәүбә»,— ти.* Ш. Бабич. **Әстәғәфирулла тәүбә** 1) хоҙай ҡаршыһында ҙур үкенес белдергәндә әйтелә; 2) *күсм.* бер нәмәгә ныҡ аптырағанда, ниҙелер бик килешһеҙ күргәндә әйтелә. *[Әбей:] Әстәғәфирулла тәүбә, киленкәйем, өйгә тәре генә кәрәк инде.* Т. Йәнәби. / Төрлө хәүефле, насар эштәрҙән аралауҙы үтенеп әйтелгән һүҙ. *[Сафура:] Тәүбә, тәүбә, киленең шул булып ҡуймаһын.* Б. Бикбай.

**2.** Ниҙелер бүтән эшләмәҫкә үҙеңә биргән ант һүҙе. *Тәүбәгә килеү.* ■ *Буранбайҙың был тәүбәһенән иптәштәр .. көлөргә тотондо.* Д. Юлтый. **Тумыртҡа** (*йәки* **туҡран**) **тәүбәһе** үтәлмәгән ялған тәүбәгә ҡарата әйтелә. **Тәүбәгә ултыртыу** насар эш-ҡылыҡты ҡабатламаҫҡа тәүбә итер хәлгә килтереү.

□ **Тәүбә итеү** (*йәки* **ҡылыу**) ниҙелер бүтән эшләмәҫкә үҙ-үҙеңә ант биреү. *[Латифа] үгәй балаларға яуызлыҡ итмәҫкә тәүбә ҡылһа ла, был тәүбәһе бик оҙаҡ дауам итмәне.* М. Ғафури.

**ТӘҮГЕ** *с.* **1.** Ғәмәлләшеүҙә ваҡыт яғынан беренсе булған. *Тәүге йыл. Тәүге көн. Тәүге ҡырау. Тәүге тапҡыр. Ҡыштың тәүге айы.* ■ *Тып-тын ғына тәүге ҡарҙар яуа, һуңғы япраҡ менән аралаш.* Р. Бикбаев. / Иҫәп яғынан беренсе булған; баштағы. *Тәүге бала. Журналдың тәүге һаны.* // *Пландың тәүгеһен ҡабул итеү.* ■ *Әгәр үҙем тәүге тотҡан балыҡты электермәһәм .. миңә бүтәнсә рөхсәт булмаясаҡ. Йәнәһе, тәүгеһен ысҡындырҙың, уңмағанды — ҡыума.* Н. Мусин. *Эшкә башлауҙың беренсе көнөндә үк был егеттәргә тәүге кеше булып батшаның ҡыҙы үҙе килде, ти* (Әкиәттән). / Берәй эште башлауҙа беренсе булған. *Беҙ үҙебеҙ тәүге булып күтәрмәйбеҙ һуғыш ҡоралын.* Р. Ниғмәти. // *Зөлхизә ҡатын-ҡыҙҙарҙан тәүгеләрҙең тәүгеһе булып.., шомло йоланы емереп үтте.* З. Биишева. **Тәүге этәс** *ҡар.* **этәс.**

**2.** *р. мәғ. ҡар.* **тәү** 1. *Тәүге ҡайтыу. Тәүге осрашыу.* ■ *Әйтерһең дә үҙ ҡатынын ул [Иш булды] бөгөн тәүге күрҙе.* Н. Иҙелбай.

**ТӘҮГӘ** *р.* Беренсе тапҡыр, тәү башлап. *Тәүгә килеү. Тәүгә ат менеү.* ■ *[Әбей — абыстайға:] Һинең менән күп ултырҙаш булмаһам да, ашыңды тәүгә күрмәйем. Гелән аяҡ баҫмаһам да килә йөрөйөм.* Т. Хәйбуллин.

**ТӘҮҘӘ** *р.* **1.** Нимәнеңдер башланған ваҡытында, тәү мәлдә, башта. *Тимербулат бер өйгә барып ингән. Тәүҙә унда бер кем дә булмаған, бер аҙҙан бер карт килеп сыҡҡан* (Әкиәттән).

**2.** Ниндәй ҙә булһа бер эштән элек, иң башта. *Үҙҙәренең элекке ырыуҙары тураһында һүҙ сыҡҡанда, ундағы халыҡ иң тәүҙә ҡыпсаҡ атамаһын телгә ала.* К. Мәргән. *[Егет — ҡыҙға:] Тәүҙә һин миңә исемеңде әйт* (Әкиәттән).

**3.** Ниндәйҙер эштә беренсе булып, башлап; башта. *Тәүҙә Имай, унан Ныязғол өйгә киттеләр.* Һ. Дәүләтшина. *Тәүҙә Заһитты саҡырттылар.* Я. Хамматов.

**ТӘҮҘӘН** *р.* Нимәнеңдер башланған мәлендә, баштан. *Тәүҙән үк ҡандары ҡомарып, яралары тоҙланып килгән йыуан ҡорһаҡтар был һүҙҙе ишеткәс, ярыла яҙҙы.* Ғ. Дәүләтшин.

**ТӘҮЕР** *с. диал.* Яҡшы, һәйбәт. *Тәүер ат.*

**ТӘҮЗИҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кемдеңдер ниҙелер өләшеү, бүлеп биреүе.

□ **Тәүзиғ итеү** (*йәки* **ҡылыу**) бүлеп таратыу, өләшеү.

**ТӘҮКӘЛ**: **буш тәүкәлгә** *диал.* бушҡа. *Буш тәүкәлгә йөрөү.*

**ТӘҮЛЕК** *и.* **1.** 24 сәғәткә тиң булған ваҡыт үлсәү берәмеге; көн һәм төндә эсенә алған ваҡыт раһы. *Ике тәүлеклек юл. Тәүлек әйләнәһенә эшләү.* ■ *Биш тәүлек инде, һаман туҡтауһыҙ киләбеҙ.* Д. Юлтый.

**2.** (*йәки* **йыл тәүлеге**) Бер йылды эсенә алған ваҡыт араһы. *Йыл тәүлекәйҙәре ун ике ай, иң яҡшыһы кәкүк айҙары* (Халыҡ йырынан). *Инде лә китеп барамын, тәүлеккәйем тулмай килә алмам* (Сеңләүҙән). / *һөйл.* Кеше үлгәндән һуң үткән тәүге йыл. *Мәрхүмдең тәүлеген үткәреү.*

**ТӘҮЛЕКЛӘҮ** *ҡ.* Ваҡытты тәүлектәргә бүлеү, тәүлек менән билдәләү. *Тәүлекләп эшләү.*

**ТӘҮЛӘ** *р. ҡар.* **тәүҙә.**

**ТӘҮЛӘП** *р.* **1.** Ниндәйҙер эш-хәлдең ғәмәлләшеүендә беренсе тапҡыр, тәү башлап. *Ҡалаға тәүләп килеү. Тәүләп осрашыу.* ■ *Һине тәүләп күргән сағымда уҡ күптән таныш кеүек күрендең.* К. Даян.

**2.** Ниндәйҙер эш-хәлдә беренсе булып, башлап; тәүҙә. *[Старшина:] Кемегеҙ башланы, кем тәүләп управляющийға ҡул күтәрҙе?* Б. Бикбай.

**ТӘҮРАТ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **таурат.**

**ТӘҮСИФ** [*ғәр.*] *и иҫк. кит.* Ниҙеңдер сифат йәһәтенән һүрәтләнеше; тасуир. *Тәүсифенә һүҙ таба алмай тиргә төштөк.* Ш. Бабич.

□ **Тәүсиф итеү** (*йәки* **ҡылыу**) һүрәтләү, тасуирлау.

**ТӘҮСИӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Кәңәш.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

□ **Тәүсиә итеү** кәңәш биреү. *Мин һеҙгә тәүсиә итер инем, ҡабул итһәгеҙ.* З. Өммәти.

**ТӘҮТОРМОШ** *и. тар.* Кешелек тарихының иң тәүге, боронғо осоро. *Тәүтормош йәмғиәте. Тәүтормош көнкүреше.* ■ *Ғимранов тап күреп белгәндәй итеп тәүтормош кешеләре тураһында,*

*уларҙың йәшәү өсөн көрәштәре, тәүге коралдары .. хакында һөйләне.* З. Биишева.

**ТӘҮФИҠ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ҡылыҡҡа, эхләккә бәйле тыйнаҡлыҡ; тәртип. *Тәүфиҡ теләү.* ■ *Баланы сабый замананда тәүфиҡ вә әҙәпкә өйрәтмәк кәрәк.* М. Өмөтбаев. **Тәүфиҡҡа килтереү** (*йәки* **ултыртыу**) насар эш-ҡылыҡ өсөн яза биреп, ныҡ шелтәләп тәүфиҡлы булырға өндәү. **Тәүфиҡ табыу** насар эш шауҡымынан ҡотолоп тыйнаҡланыу, әҙәплегә әйләнеү. *Ҡарғамағыҙ мине. Мин тәүфиҡһыҙ, тәүфиҡ таба алмаған нарасый.* Ғ. Амантай.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ТӘҮФИҠЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Тыйнаҡлыға әйләндереү, тәүфиҡлы итеү.

**ТӘҮФИҠЛАНЫУ** *ҡ.* Тыйнаҡлыға, тәртиплегә әйләнеү; тәртипле булыу.

**ТӘҮФИҠЛЫ** *с.* Үҙен тота белгән, эхләҡи яҡтан тыйнаҡлы; тәртипле, әҙәпле. *Тәүфиҡлы кеше. Тәүфиҡлы булыу.* ■ *Ҡыҙ үҙе сибәр, уңған,.. бик тәүфиҡлы бала икән.* Ф. Иҫәнғолов.

**ТӘҮФИҠҺЫҘ** *с.* Ҡылыҡ, эхләҡ яғынан тыйнаҡһыҙ; тәртипһеҙ, әҙәпһеҙ. *Тәүфиҡһыҙ бала.* ■ *Мулла йәшерәк ваҡытында тәүфиҡһыҙырак булған да, аҙаҡ тәүбә итеп, Зәйнулла ишанға мөрит булып, һабаҡ алған.* М. Ғафури.

**ТӘҮФИҠҺЫҘЛАНЫУ** *ҡ.* Тыйнаҡһыҙға, тәртипһеҙгә әйләнеү, тәүфиҡһыҙ булыу. *[Гөлйөҙөм:] Ярай ҙа ул үҙен килен итеп һанаһа.., тәүфиҡһыҙланмай, ата-әсә итеп ҡараһа.* С. Ҡудаш.

**ТӘҮФИҠҺЫҘЛЫҠ** *и.* Тәүфиҡһыҙ булыу сифаты. *[Сәлмович:] Тәүфиҡһыҙлыҡ яҡшыға алып бармай, Исмәғил, ниңә аңламайһың шуны, ә?* Я. Вәлиев.

**ТӘҮҺЕНЕҮ** *ҡ. диал.* Тәү күреп ятһыныу; ситһенеү. *Бесәйҙең быға тиклем бер ваҡытта ла төлкө күргәне булмаған.. Улар икеһе лә тәүһенеп осрашҡан* (Әкиәттән).

**ТӘҮӘЖЖЕҺ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Йүнәлеш, боролош. *Тәүәжжеһ яһау.*

**2.** Иғтибар. *Кешенең тәүәжжеһен йәлеп итеү.*

**ТӘҮӘККӘЛ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Ҡурҡып, икеләнеп тормай эш итеүсән; ҡыйыу. *Тәүәккәл кеше.* ■ *[Директор ярһып:] Һеҙ ҡурҡаһығыҙ, быныһына батырсылыҡ итмәйһегеҙ. Ниңә һеҙ тәүәккәл түгел?* И. Абдуллин. *Егет кенә булһаң, тәүәккәл бул, тәүәккәллек кәрәк һәр эштә* (Халыҡ йырынан).

**2.** Икеләнеп торғандан һуң бер эште эшләргә ныҡлап ҡарар иткәндә белдерә. *Булмаһа булмаҫ, тәүәккәл.. Йәшәһен киммәтселек.* Ш. Бабич.

□ **Тәүәккәл итеү** тәүәккәлләү. *[Йәмилә] керергә баҙнатлыҡ һәм батырсылыҡ итә алмай торҙо. Унан аллаға тәүәккәл итеп ишекте асып ебәрҙе.* М. Ғафури.

**ТӘҮӘККӘЛЛЕК** *и.* Ҡыйыулыҡ, баҙнатлыҡ сифаты. *Тәүәккәллек менән эш итеү.* ■ *[Ҡуҙыйкүрпәсгең] өҫтөнлөгөн белгән Көслөбай үҙенең тәүәккәллегенә эстән үкенеп тә ҡуя, шулай ҙа көрәштән баш тартмай.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

□ **Тәүәккәллек итеү** батырсылыҡ итеү, тәүәккәлләү.

**ТӘҮӘККӘЛЛӘНЕҮ** *ҡ.* Тәүәккәлгә (1 мәғ.) әйләнеү, тәүәккәл булыу.

**ТӘҮӘККӘЛЛӘҮ** *ҡ.* Икеләнеп торғандан һуң ниҙәлер эшләргә ныҡлап ҡарар итеү; тәүәккәл итеү. *Вәли был ҙур эшкә тәүәккәлләгән дә бик күп баш ватты.* М. Ғафури.

**ТӘФРИҠ** [*ғәр.*]: **тәфриҡ итеү** (*йәки* **ҡылыу**) *иҫк. кит.* айырыу, айырым итеү.

**ТӘФРИҠА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Айырмалыҡ, башҡалыҡ.

**ТӘФРИТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Нимәнелер баһалап еткермәү, баһаһын кәметеү күренеше. *[Тәржемәи хәлемде] һүрәтләп биргән ваҡытта ифрат һәм тәфриттән бик ныҡ һаҡландым.* М. Ғафури.

**ТӘФСИЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ентекле аңлатма. *Тәфсил биреү.*

**ТӘФСИЛЛЕ** *с. кит.* Ентекле, тулы. *Тәфсилле яуап. Тәфсилле рәүештә. Тәфсилле итеп. Тәфсилле итеп һөйләү.* ■ *[Яңы командир] асыҡ, тәфсилле күрһәтмә биреп аңлатмайынса.., тактик хаталар яһап ташлаған.* С. Әлибаев.

**ТӘФСИЛЛӘҮ** *ҡ.* Ентекләү, төпсөү. *Тәфсилләп аңлатыу. Тәфсилләп тикшереү. Тәфсилләп һөйләү.* ■ *Зәкиә апай тәүҙә һәр хатты төпсөп, ваҡ ҡына итеп яҙылған хәрефтәрен тәфсилләп ҡараны.* Т. Килмөхәмәтов.

**ТӘФСИЛӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит. ҡар.* **тәфсил**.

**ТӘФСИР** [*ғәр.*] *и. кит.* Аңлатма, комментарий. *Ҡөрьән тәфсире.* ■ *Беҙҙә ҡөрьән һәм әфтиәк тәфсирҙәре була торғайны.* З. Биишева.

□ **Тәфсир итеү** (*йәки* **ҡылыу**) аңлатма биреү, төшөндөрөү.

**ТӘФСИРЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Аңлатыу, төшөндөрөү. *Тәфсирләп биреү.*

**2.** *ҡар.* **тәпсирләү**.

**ТӘФТИШ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Төрлө маҡсатта (белеү, асыҡлау, мәғлүмәттәр алыу маҡсатында) үткәрелгән тикшереү эше. *Фәнни тәфтиш. Тәфтиш яһау.* ■ *[Мифтахты] тәүҙә һалдаттан ҡаҫҡан дезертир сифатында ҡулға алғандар. Ләкин тәфтиш барышында был дөрөҫләнмәгән.* К. Мәргән. *Тәфтиш бюроһы тикшереү эшен бөткән, ваҡиға тамам асылған иҫәпләп, бөтә эште хәрби судҡа, прокурорға тапшырҙы.* И. Насыри. / Берәй ойошма йәки вазифалы кешенең эшен тикшереү, ҡарау эше; ревизия. *Тәфтиш үткәреү. Тәфтиш комиссияһына ағзалар һайлау.*

**2.** Россияла 18-19 быуаттарҙа йән башынан яһаҡ алыу өсөн үткәрелгән халыҡ иҫәбе; рәүиз.

□ **Тәфтиш итеү** (*йәки* **ҡылыу**) тикшереү, ҡарау. *[Хан:] Арыҫлан үлгән, эше бөткән. Мин хан һеҙгә, рөхсәтем юҡ тәфтиш ҡылып йөрөмәккә!* «Бабсаҡ менән Күсәк».

♦ **Мәхкәмә тәфтише** суд, хөкөм өсөн үткәрелгән тикшереү эше. *Ур тамағында бер нисә көн буйы мәхкәмә тәфтише барҙы.* Ғ. Ибраһимов.

**ТӘФТИШЛӘҮ** *ҡ.* Ҡарап тикшереү. *[Ҡарт — әбейенә:] Тимерйән, ана, ҡайтып килер, ни булғанын үҙе тәфтишләп асыҡлар. Һинең улар араһына ҡыҫылыуыңдан .. файҙа юҡ.* Ш. Янбаев.

**ТӘФТИШСЕ** *и.* Тикшереү эше алып барыусы. *Тәфтишселәр яҡындағы ҡайын төбөнөң ат тояғы менән бик ныҡ тапалғанына ҡарап, енәйәтсенең һыбайлы булғанын .. иҫбат иткән.* С. Кулибай.

**ТӘФӘККЕР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кемдеңдер уйланыуы, уйға сумыуы. *Күҙ текәп бер нөктәгә, китте бик төпһөҙ тәфәккергә таба.* Ш. Бабич.

□ **Тәфәккер итеү** (*йәки* **ҡылыу**) уйланыу, уйға батыу.

**ТӘФӘХХЕР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кемдеңдер маҡтаныуы.

□ **Тәфәххер итеү** маҡтаныу. *Тәфәххер итәләр ер һатҡанына* (Бәйеттән).

**ТӘХЕЛ** [*төрк.*]: **тәхел шарабы** игендән эшләнгән аҡ араҡы.

**ТӘХЕТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Хөкүмәт эштәрен башҡарғанда батша йәки король ултырыу өсөн ҡалҡыу урынға ҡуйылған аҫыл биҙәкле урындыҡ. *Алтын тәхет. Тәхеттә ултырыу.* ■ *Дурт батырын эйәртеп, колдан тәхет күтәртеп.. Катил батша килгән, ти.* «Урал батыр». / Батша йәки король власының символы рәүешендә ҡулланыла. *Тәхеткә ултырыу. Тәхеттән төшөү. Тәхет емерелеү.* ■ *Романовтарҙың өс йөҙ йыллыҡ тәхете ҡолап төшөп, шуның тауышы бөтә донъяға таралып шаулай ине.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Юғарыға күтәргән, абруй биргән нәмә. *Хеҙмәт тәхете.* ■ *Зәңгәр күк — тажым, сыбар ер — тәхетем.* Ш. Бабич. *Хәҙергә гөлдәр минең тәхетем.* Д. Юлтый.

● *Бер кеше тәхеткә менһә, ҡырҡ кеше атҡа менә.* Мәҡәл.

**ТӘХҠИҠ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Дөрөҫлөк, хаҡлыҡ. *Мин үҙем бер дәрдмән диуанамын, ҡайҙа бер тәхҡиҡ күрһәм, ҡыуанамын.* Аҡмулла.

**ТӘХҠИҠЛАУ** *к. иҫк. кит.* Дөрөҫләү. *[Яһаҡ күләмен] тәхҡиҡлап оло батшаның оло һанаттарының ҡулы ҡуйылған.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ТӘХҠИР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Мыҫҡыл. *Ғәҙәте йә истиһза, йәки тәхҡир, һүҙ һөйләмәҫ бирәүҙе жәрех ҡылмай.* Аҡмулла.

□ **Тәхҡир итеү** (*йәки* **ҡылыу**) мыҫҡыллау, хурлау. *Ниндәй шәп булһам да мин, тәхҡир итепһең, бешмәгән.* Ш. Бабич.

**ТӘХҠИРАНӘ** [*ғәр.* ⟨ *фарс.*] *р. иҫк. кит.* Мыҫҡыллы рәүештә, мәсхәрә менән. *Йылмайып мыҫҡыллы күҙҙәр үттеләр ваҡ-ваҡ баҫып, үттеләр ҙә тәхҡиранә көлдөләр шарҡылдашып.* Ш. Бабич.

**ТӘХҠИРЛЕ** *с. иҫк. кит.* Мыҫҡыллы. *Баяр ҡатынының уларҙы [крәҫтиәндәрҙе] тәхҡирле һүҙҙәр менән һүгеп, ҡол итеп тороуҙары асыуҙы ҡабартты.* М. Ғафури.

**ТӘХЛИЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡарау, тикшереү эше; анализ.

□ **Тәхлил итеү** тикшереү, анализлау.

**ТӘХМИЛ** [*ғәр.*]: **тәхмил итеү** үҙ өҫтөңә алыу, ҡабул итеү. *Выждандары тәхмил итмәҫ иттифаҡ илә мөгәллимдәренә вазифа бирәләр.* М. Ғафури.

**ТӘХМИНӘН** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Сама менән, яҡынса. *Ғәхминән биреү.* ■ *Данлыҡлы башҡорт ғәскәрҙәре тәхминән 1919 йыл 10-15 сентябрҙә .. бик тиҙ арала Петроградҡа оҙатылырға приказ алды.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**ТӘХРИЗНАМӘ** [*ғәр.* + *фарс.*] *и. иҫк. кит.* Өндәмә. *Шәрүк ҡылдым тәзкир вә тәхризнамә яҙмаҡҡа.* «Батыршаның хаты».

**ТӘХРИР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Редактирлау эше.

**2.** Рәсми ҡағыҙ, хат.

**ТӘХСИЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ҡаҙаныш. *Мәғрифәте тәхсилдән һис бер ваҡыт иренмә.* Ш. Бабич.

**2.** Уҡыу, белем алыу. *Миргәле гилме тәхсил өсөн Хорезмға килде.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

□ **Тәхсил итеү** (*йәки* **ҡылыу**) 1) өлгәшеү, ҡаҙаныу; 2) өйрәнеү, белем алыу. *[Өлкәндәр — Кинйәгә:] Ғилем тәхсил ҡылыу юлында изге уйың булғас, Бохари шәрифкә сәфәр тот.* Ғ. Ибраһимов.

**ТӘХСИН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Маҡтауҙы, хуплауҙы белдергән һүҙ. *Ҡылған эшемә хаҡ ҡуя алмаҫтар тимә, «афарин», «тәхсин» тип, телгә алмаҫтар, тимә.* М. Ғафури. / Белем кимәлен күрһәткән «яҡшы» билдәһе. *Башҡа шәкерттәргә «афарин», «тәхсин» билдәләре ҡуйылғанда, Ғәлиәкбәров Садрислам гел «имтияз» билдәһе генә алыр булды.* Ф. Иҫәнғолов. *Ул [Ғариф] улан дары алған «афарин», «тәхсин» шәһадәтнамәләрен быялалатып [ҡуйҙы].* Ғ. Хәйри.

**ТӘҺДИД** [*ғәр.*]: **тәһдид** итеү ҡурҡытыу, янау. *[Талаптар] мәҙрәсә идараһы һәм мөдәристәр тарафынан ҡабул ителмәгән һурәттә уҡыу ташлау, мәҙрәсәнән сығып китеү менән тәһдид ителә ине.* М. Ғафури.

**ТӘҺЛИЛ** [*ғәр.*] *и. дини* «Лә илаһи илла алла» (бер алланан башҡа алла юҡ) тигән һөйләмдең ҡабат-ҡабат әйтелеше (йөҙ тапҡыр әйтелә). *Өйгә, килеп, тәһлил әйтеп, доға ҡылдылар ҙа, әсәйҙең кәүҙәһен күтәреп, йыназа ағасына сығарып һалдылар.* М. Ғафури.

**ТӘҺӘЖЖЕД** [*ғәр.*] *и. дини* Төн уртаһында уҡыла торған намаҙ. *Тәһәжжед намаҙы.* ■ *Фарыз, гилем, тәглимдә юҡ ҡайғыһы, үҙе уҡыр тәһәжжед тороп кистән.* Аҡмулла.

**ТӘҺӘРӘТ** [*ғәр.*] *и. дини* **1.** Намаҙ алдынан ҡул-аяҡты сайыу тәртибе. *[Киҙеүҙең:] — Тәһәрәткә! Икенде ахшамға! — тигән тауышы сыҡты.* М. Ғафури. *Иман белмәй, дин тотмайса мөрит булмаҡ, тәһәрәттең хөкөмөн белмәй намаҙ ҡылмаҡ .. дин исламдан тайыуҙың башы имде* (Мөнәжәттән). **Тәһәрәт алыу** намаҙ алдынан аяҡ-ҡулды сайыу; йыуыныу. *Көндәгесә минең өләсәй, ахшам тиеп, тәһәрәт алды ла, намаҙлығын йәйҙе түр башына.* М. Абдуллин.

**2.** *һөйл.* Ярау. *Оло тәһәрәт. Кесе тәһәрәт.*

● *Һыу күргәндең тәһәрәте бар.* Мәҡәл.

**ТӘҺӘРӘТЛӘНЕҮ** *к. дини* Намаҙға әҙерләнеп сайыныу, тәһәрәт алыу.

**ТӘШБИҺ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ниҙеңдер оҡшатып, сағыштырып бирелеше; аллегория. *[Автор] тормошто мөбаләғәләр, тәшбиһтәр менән кәүҙәләндерергә тырыша.* Д. Юлтый.

□ **Тәшбиһ итеү** (*йәки* **ҡылыу**) сағыштырыу, оҡшатыу. *Тимер, беҙҙең орлокто һин тәшбиһ ҡыл һыйырға.* Ш. Бабич.

**ТӘШКИЛ** [*ғәр.*]: **тәшкил итеү** күләм, һан иҫәбенә инеп, бер бөтөндө барлыҡҡа килтереү, бөтөн яһау. *Урмандың яртыһын ылыҫлы ағастар тәшкил итә.* ■ *Был цехтың бинаһы өс гектар ерҙе тәшкил итә.* М. Ғафури.

**ТӘШНӘ** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Ҡомарлы, ҡомһоҙ. *Ғөрбәт эсрә ҡалдығы тәшнә хажиҙар өсөн.* М. Өмөтбаев.

**ТӘШРИФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кемдеңдер берергә йәки бер кеше ҡаршыһына ҡыҫҡа ваҡытҡа барыуы; визит.

□ **Тәшриф итеү** (*йәки* **ҡылыу, бойороу**) килеү, барыу. *[Ҡуян — айыуға:] Күптән көткән падишаһ хәҙрәттәре мәмләкәтебеҙгә тәшриф бойорҙолар, һеҙҙе күреп һөйләшмәксе була.* Б. Мирзанов.

**ТӘШТИТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ғәрәп орфографияһында: ҡуш тартынҡыны белдереү өсөн хәреф өҫтөнә ҡуйылған диакритик билдә.

**ТӘШТИТЛӘҮ** *ҡ. иҫк.* Ҡат-ҡат ҡабатлау. *Тәштитләп һөйләү.*

**ТӘШҮИШ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Шикләнеүҙән килгән күңел тынысһыҙлығы, шөбһә. *Тәшүишкә төшөрөү. Тәшүиш һалыу.*

**2.** Буталыш, бола. *Аҡтар араһында ғауға, тәшүиш, тәртипһеҙ сигенеү башлана.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**ТӘШҮИШЛЕ** *с.* **1.** Шик-шөбһә уятҡан, ҡурҡыуға төшөргән. *Тәшүишле хәбәр.* ■ *Шикле, тәшүишле һораүҙар шом-хәүефте көсәйткәндән-көсәйтә.* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** Шик-шөбһә белдергән, шикләнгән, ҡурҡҡан. *[Зөфәр:] Һеҙ ярлы халыҡ теләгән ирекҡә тәшүишле ҡарашығыҙ менән үҙегеҙҙең йөҙөгөҙҙө генә асаһығыҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**ТӘШҮИШЛӘНЕҮ** *ҡ.* Ҡурҡыу, шикләнеү ҡатыш аптырау, тәшүишләнеп тороу. ■ *Тәшүишләнеп ҡалған .. мулла, башта ни тиергә лә белмәйенсә, өндәшмәй торҙо.* В. Исхаҡов.

**ТӘШӘККЕР** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Яҡшылыҡҡа ҡаршы белдерелгән рәхмәт. *Ярлы илдәр яҡты көндәр күреп, тәшәккерҙәр уҡый күңелдән.* Д. Юлтый.

□ **Тәшәккер итеү** рәхмәт белдереү, рәхмәт әйтеү.

**ТӘШӘНӘ** *и. ҡар.* **кәшәнә.**

**ТӘЬМИН** [*ғәр.*]: **тәьмин итеү** 1) кәрәк-яраҡ менән ҡәнәғәтләндереү. *Аҙыҡ менән тәьмин итеү. Эш ҡоралдары менән тәьмин итеү;* 2) матди йәһәттән ҡәнәғәтләндереү. *Кешенең картлығын тәьмин итеү;* 3) тейешле шарт менән ҡәнәғәтләндереү. *Үҫемлектең үҫешен тәьмин итеү. Эштең үтәлешен тәьмин итеү.*

**ТӘЬМИНӘТ** [*ғәр.*] *и.* Төрлө матди ихтыяждың ҡәнәғәтләндерелеше һәм шул ҡәнәғәтләндереүгә бәйле һәр төрлө сара. *Тәьминәт булеге. Тәьминәт эштәре. Дәүләт тәьминәтендә булыу.*

**ТӘЬМИНӘТСЕ** *и.* Тәьминәт эшендә эшләгән хеҙмәткәр. *Председатель .. тәьминәтселәрҙе йыйнаған.* Ғ. Рамазанов.

**ТӘЬСИС** [*ғәр.*]: **тәьсис итеү** *иҫк. кит.* Нимәгәлер нигеҙ һалыу, ойоштороу, төҙөү. *Яңы хужалыҡ тәьсис итеү. Тау эше буйынса идаралыҡ тәьсис итеү.*

**ТӘЬҪИР** [*ғәр.*] *и.* Кем йәки нимәнеңдер икенсе берәүгә йәки нәмәгә тейгән шауҡымы һәм шунан килгән һөҙөмтә. *Көслө тәьҫир. Кире тәьҫир. Ыңғай тәьҫир. Дарыуҙың тәьҫир көсө. Яҡшы тәьҫир ҡалдырыу. Насар тәьҫир уятыу. Йыр тәьҫиренә бирелеү.* ■ *Әхмәҙулла бабай һүҙен бөтөрҙө. Һөйләгән ваҡиғалар тәьҫирендә бер аҙ тын ултырҙыҡ.* Ә. Вахитов.

□ **Тәьҫир итеү** йоғонто яһау. *Йыр бөтәһенә лә бик ныҡ тәьҫир итте, буғай, оҙаҡ ҡул саптылар.* Д. Юлтый.

**ТӘЬҪИРЛЕ** *с.* **1.** Тәьҫир итерлек, йоғонто яһарлыҡ көсө булған. *Тәьҫирле һүҙ. Тәьҫирле сара. Тәьҫирле итеп һөйләү. Тәнкит тәьҫирле булды.*

**2.** Тәьҫиргә бирелеүсән, әҫәрләнеүсән. *Бала күңеле тәьҫирле була.*

**ТӘЬҪИРЛӘНЕҮ** *ҡ.* Кем йәки низер йоғонтоһонда тойғоға бирелеү; әҫәрләнеү. *Тәьҫирләнеп йырлау. Тәьҫирләнеп һөйләү. Тәьҫирләнеп тыңлау.* ■ *Бына Тимербай тураһында һөйләһәң дә ярай. Ул, исмаһам, батырҙарҙың батыры.. ине,— тине Булат ағай, бик тәьҫирләнеп.* И. Ғиззәтуллин.

**ТӘЬҪОРАТ** [*ғәр.*] *и.* Кем йәки низеңдер йоғонтоһо уятҡан уй-тойғо, кисереш һ. б. *Ауыр тәьҫорат. Бай тәьҫорат. Тәьҫоратҡа бирелеү.* ■ *Бөгөн Таһир Кусимов ифрат матур тәьҫорат ҡалдырҙы. Бөтәһе лә: «Вәт, боевой командир!» — тиҙәр.* С. Әлибаев.

**ТӘЬҪОРЛАНЫУ** *ҡ. ҡар.* **тәьҫирләнеү.**

**ТӘЬҮИЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Төш юрауы.

□ **Тәьүил итеү** юрау. *Төштө тәьүил итеү.*

**ТӘЬХИР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кемдеңдер һуңлауы.

**ТӘЬХИРЛӘНЕҮ** *ҡ. иҫк. кит.* Кисегеү, һуңлау. *Тәьхирләнмәй өйгә ҡайттым.* «Батыршаның хаты».

**ТӘӘННӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Әкренлек. *Һөнәребеҙ йә тәәннәт, йә истихфаф, уҙ ҡылған эшебеҙ юҡ иҫебеҙҙә.* Аҡмулла.

**ТӘӘССӨФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Үкенес, ҡыҙғаныс. *Тәәссөф, эй тәәссөф.., нисек гәр итмәй йөрөйһөгөҙ, эй ағайҙар* (Бәйеттән).

□ **Тәәссөф итеү** үкенеү. *[Садиҡ:] Эштең был дәрәжәгә килеп етеүенә тәәссөф итмәй булмай.* Ғ. Ныязбаев. **Тәәссөфкә ҡаршы** *инш.* үкенескә ҡаршы. *Мин паспорттың .. тәәссөфкә ҡаршы өйҙә онотолоп ҡалғанын һөйләнем.* М. Ғафури.

**ТӘӘҪҪОР** [*ғәр.*] *и иҫк. кит.* **1.** *ҡар.* **тәьҫир.** *Шул замандан ҡалған тәәҫҫор арҡаһында күҙемә йәш килгәнен һиҙмәй ҙә ҡалам.* М. Ғафури.

**2.** Тәьҫиргә бирелеүсәнлек, хиссәнлек.

**ТӘӘҪҪОРАТ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **тәьҫорат.**

**ТЮ́БИК** [*рус.*] *и.* Вазелин, крем, елем кеүек нәмәне һығып сығарыуға йәтешләп, полиэтилен йәки ҡалайҙан эшләнгән оҙонса һауыт. *Бер тюбик крем.*

**ТЮЛЕ́НЬ** [*рус.*] *и.* Оҙонса йомро кәүҙәле, ҡыҫҡа муйынлы, ишкәк аяҡлы имеҙеүсе диңгеҙ хайуаны. *Тюлень балаһы. Тюлень майы. Тюлень аулау.*

**ТЮЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Үҙенән сыҡҡан биҙәкле бик йоҡа селтәр. *Аҡ тюль. Тәҙрәгә тюль элеү.* // *Тюль корма.*

**ТЮЛЬПА́Н** [*рус.* ⟨ *итал.*] *и.* Ләлә һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, яңғыҙ ҡыңғырау сәскәле, һуған төплө баҡса гөлө. *Аҡ тюльпан. Ҡыҙыл тюльпан. Һары тюльпан.*

**ТЮРКО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Тюркология буйынса белгес.

**ТЮРКОЛО́ГИЯ** [*рус.*] *и.* Төрки халыҡтарҙың телен, тарихын, әҙәбиәтен һәм культураһын өйрәнгән гуманитар фәндәр йыйылмаһы.

**ТЯГА́Ч** [*рус.*] *и.* Ауыр йөктәрҙе йәки йөклө машиналарҙы тартыу өсөн ҡулланылған бик көслө трактор йәки автомобиль.

# У

**У** [1] Башҡорт алфавитының егерме етенсе хәрефе.

**У** [2], **у-у-у** *оҡш.* Өҙлөкһөҙ геүләгән тауышты белдергән һүҙ. *Ел-дауыл ҡүтәрелгән, аҙна буйы ҡойоп ямғыр яуған, .. тау ҙа у-у-у тип, үһылдап тора торған булған.* М. Тажи.

**У** [3], **у-у-у** *ымл.* **1.** Һоҡланыу, кинәнеү кеүек ыңғай тойғо белдергәндә әйтелә. *[Кәҙерголов:] У-у-у, бөгөнгө ашығыҙ тәмле.* С. Сәйтов.

**2.** Ерәнеү, яратмау кеүек кире тойғо белдергәндә әйтелә. *У-у-у, ниндәй ҡотһоҙ!* Б. Бикбай.

**3.** Үс, асыу кеүек көслө тойғо белдергәндә әйтелә. *[Һалдат:] У-у! Быуып ҡына үлтерергә лә бүрегә ташларға ине көсөктө!* З. Биишева.

**4.** Ниндәйҙер эш-хәлдең бик оҙаҡ, бик мәшәҡәтле булыуын билдәләгәндә әйтелә. *[Зөлхизә:] У-у-у! Бик оҙаҡ бит.* С. Агиш.

**УБА** [1] *и.* Бәләкәй генә түмәләс тау, ҡалҡыу ер. *Уба түбәһе.* ■ *[Еңгәләрҙең] һалағырыҡ булғандары көлдө ишек ауыҙына өйә. Күп йыл буйы йыйылған был көл бара-бара ҙур уба хәленә килә.* Ғ. Дәүләтшин. / Бороңғо ҡәберлек өҫтөнә өйөлгән ер.

**УБА** [2] *и. диал. ҡар.* **соҡор** [1] 1, 3.

**УБАЛАЙ** *р. диал.* Бөтөнләй, тотош.

**УБАЛСЫҠ** *и.* Бәләкәй генә уба [1]. *Убалсыҡлы киң ялан.*

**УБАЛСЫҠЛАНЫУ** *ҡ.* Убалсыҡтар менән ҡапланыу, убалсыҡлы булыу. *Ауылдың тәпәшәк өйҙәре, ялпаҡ йорттары, кәүҙжек ҡуралары ҡалын көрт аҫтында ҡалған. Өй түбәләре генә, өйөлөп ҡатып ҡалған балсыҡ кеүек булып, убалсыҡланып ята.* Ғ. Дәүләтшин.

**УБАЛЫҠ** *и.* Күп уба [1], төрлө түмәләс булған ер. *Мерәсем убалығы утыҙлаған бәләкәй генә ҡәберлектән тора.* Н. Мәжитов.

**УБАСЫҠ** *и.* Бәләкәй генә уба [1]; убалсыҡ. *Юл .. дала битен сыбарлап, миң кеүек һибелеп ятҡан убасыҡтар араһынан бара.* И. Көҫәпҡол.

**УБЕ́ЖИЩЕ** [*рус.*] *и.* Ғәскәрҙең шәхси составын һәм граждан халҡын күпләп зарарлау, зыянлау ҡоралы тәьҫиренән һаҡлау өсөн махсус йыһазландырып эшләнгән ҡоролма.

**УБЫЛМА** *и. диал. ҡар.* **соҡор** [1] 1, 2, 4.

**УБЫЛЫУ** *ҡ.* Уйылып аҫҡа төшөү (ергә ҡарата). *[Әхтәрйәндең] уң аяғы, ер убылғандай, аҫҡа өңөлөп төшөп китте.* Р. Низамов.

**УБЫР** *и.* **1.** Төрлөсә сихырлай, бөтә нәмәне йота торған ҡурҡыныс эбей киәфәтендәге яуыз мифик зат; мәскәй. *Теге убыр тағы етә башланы, ти. Килен тағы бер бармағын өҙөп ташланы, ти* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Туймаҫ тамаҡ, күп ашаусы (кеше, хайуан, ҡош-ҡортҡа ҡарата); мәскәй.

◆ **Ҡарт убыр** әрләгәндә әйтелә. **Төн убыры** төнө менән йөрәп, маҙа китәргән кешегә әрләп әйтелә. **Убыр күҙ** шөйтөләнгән буйлыҡтың остағы оҙон күҙе. **Убыр уты** төнөн яҡтырып күренгән фосфор газы (дини хөрәфәтсә, кешегә ҡағылғанда ауырыта, зәғиф яһай).

● *Убырҙың үҙе туйһа ла күҙе туймай.* Мәҡәл.

**УБЫРЛЫ: убырлы ҡарсыҡ** 1) әкиәттәрҙә ла суирлана торған сихырсы, ҡот осҡос йәмһеҙ ҡарсыҡ заты. *Килен аттан төшөп, йәйәү йүгерә. Убырлы ҡарсыҡ атты ашап тороп ҡала* (Әкиәттән); 2) ҡарт, йәмһеҙ һәм уҫал ҡарсыҡтарға ҡарата әйтелә.

**УБЫУ** (упғ) *ҡ.* **1.** Һурып, эскә тартыу. *Һеҙ уба. Убып алыу.* / Һурылып батыу йәки йәбешеү. *Ҡолсобай, еүеш мәтегә упҡан аяҡтарын көскә һурып, .. һуҡыр сысҡан кеүек үрмәләй ине.* Я. Хамматов.

**2.** Аҫтан йыуып, емереү; ашау. *Ҡар һыуҙары, йырғанаҡтар ҡушылған урынды, йыл һайын уба торғас, тәрән бер соҡор яһаған.* С. Ҡудаш.

**3.** *күсм.* Үҙеңдеке итеү, үҙләштереү. *Их, яуыз бай... Көсөбөҙҙө беҙҙең уба бара, ә бер телем икмәк ҡыҙғана.* Ғ. Хәйри.

◆ **Ер упҡыры** ҡарғағанда әйтелә. **Ер упһын** 1) ант иткәндә әйтелә. *Кире сигенә торған булһам, ошо урында ер упһын!;* 2) ҡарғағанда әйтелә.

**УВЕРТЮ́РА** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* **1.** Опера, балет, кинофильмдың һ. б. музыкаль инеш өлөшө. *«Салауат Юлаев» операһының увертюраһы.*

**2.** Оркестр өсөн соната төрөндә яҙылған әҫәр. *Увертюра уйнау.*

**УГЛЕВО́Д** [*рус.*] *и. биол., хим.* Углерод, кислород һәм водородтың тереклек өсөн кәрәк булған органик берләшмәләрҙең күп һандағы һәм киң таралған төркөмө.

**УГЛЕВОДОРО́Д** [*рус.*] *и. хим.* Углерод менән водородтан ғына торған органик берләшмәләр төркөмө.

**УГЛЕКИСЛОТА́** [*рус.*] *и.* Ике кислород атомлы углеродтың яңылыш атамаһы.

**УГЛЕКИ́СЛЫЙ** [*рус.*]: **углекислый газ** углерод янғанда барлыҡҡа килгән төҫһөҙ газ.

**УГЛЕРО́Д** [*рус.*] *и.* Химик элемент, тәбиғәттәге органик матдәләрҙең мөһим өлөшө. *Углерод атомы. Углерод берекмәһе.*

**УГЛЕРОДЛЫ** *с.* Составында углероды булған. *Углеродлы ҡорос.*

**УГОЛО́ВНИК** [*рус.*] *и. ҡар.* **енәйәтсе.**

**УГОЛО́ВНЫЙ** [*рус.*] *с. ҡар.* **енәйәтле.**

**У́ГРО-ФИН** *и. ҡар.* **уғыр-фин.**

**УҒАН** *и. иҫк.* Алла, хоҙай, тәңре.

**УҒАСА** *р.* **1.** Ул ваҡытҡа тиклем, уға тиклем. *Германияны бик культуралы хөкүмәт тиҙәр. Шуларҙың ят ҡалаларын, ауылдарын, ҡырҙарын күреү ҡыҙыҡһындыра. Уғаса, бәлки, солох та булыр әле.* Д. Юлтый.

**2.** (*йәки* **уғаса булмай**) Ниҙеңдер артынса уҡ, күп тә үтмәй, шунда уҡ; ул арала. *Машина тауышы туҡтағас, .. Турысай ҙа ипкә килде. Уғаса .. эшселәр эштән бушанып, ябырылып сыға башланы.* Т. Хәйбуллин. *Уғаса бул-*

*май иртә менән осраған матур мыйыҡлы милиционер ҙа килеп етте.* С. Агиш.

**УҒАТА** *р.* **1.** Бигерәк, бигерәк тә, үтә. *Тыуа-тыуғаны бирле шыршы, ҡарағай урмандары араһында үҫкән был егеткә ялан тәбиғәте уғата ирмәк тойолдо.* Ж. Кейекбаев.— *Йә, ярар,— тип, уғата ҡәнәғәт тауыш менән үҙенсә һығымта яһап ҡуя Өйрәнсек.* З. Биишева.

**2.** (*йәки* **уғата тиһә**) Уның һайын, тағы ла. *Дүшәмбе көн инс. Был көндәрҙә Ҡорбанов айырыуса нык асыулы була: .. ҡыйғыр суҡышындай мороно уғата ҡыҙылыраҡҡа әйләнгәндәй тойола.* Б. Бикбай. *Атайымдың муйынына аҫылынам. Һаҡал-мыйығы битемде сәнсә, мин уғата һырлығам.* Ш. Янбаев.

**3.** Ул тиклем, улай уҡ.— *Ҡарамалымы? Ҡарамалы уғата йыраҡ түгел дә ул.* М. Тажи.

◆ **Уғата тигән** бик шәп, бына тигән. *[Этҡол:] Һай-һай, Ҡорманбай, уғата тигән сәсәнһең дә баһа, байға ҡаратып йырлағаның бот електәренә тиклем етте бит!* Т. Хәйбуллин.

**УҒЛАН** *и. иҫк. ҡар.* **ул** [1].

**УҒРАУ** *к. иҫк. ҡар.* **тарыу** [1] 2. *Сиргә уғрау.*

**УҒРЫ** *и.* **1.** Урлаша торған кеше. *Шаһибәрәк тигән атаҡлы уғры була. Ул Биккол ауылы малын урлай* (Хикәйәттән). / Юлбаҫар, ҡараҡ. *Юлаусы ла күңелен тар тотһа ла [урман] йәшереп аҫрай үҫал уғрыны.* Ғ. Сәләм.

**2.** *с. мәғ. күсм.* Тоғролоҡһоҙ, намыҫһыҙ. *Күсәк әйтә: «Илама һин боҙоп төҫөң. Тоғро булып торам тиһәң был донъяла, Көләмбәттәй уғры эшкә һалма көсөң!* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**УҒРЫЛЫҠ** *и.* Урлау шөғөлө, урлау ғәҙәте. *Уғрылыҡты ташлау.*

**УҒЫҘ** [1] *и.* Хәҙерге төрки халыҡтарҙың төрөк, төрөкмән, әзербайжан һәм гагауз халыҡтарын эсенә алған бер төркөмө. *Уғыҙ телдәре. Уғыҙ халҡы.*

**УҒЫҘ** [2] *и. диал. ҡар.* **ыуыҙ** [1] 1.

**УҒЫЛ** *и. иҫк. ҡар.* **ул** [1].

**УҒЫЛДЫҠ** *и. диал.* Балтыр.

**УҒЫРЛАУ** *к. иҫк.* Урлау.

**УҒЫР-ФИН: уғыр-фин телдәре** венгр, хант, манси, фин, карел, эстон, саам, мари, коми, удмурт һ. б. халыҡтарҙы эсенә алып, урал ғаиләһе телдәренең бер тармағын тәшкил иткән төркөм.

**УҒЫУ** (*уҡы*) *к. иҫк.* Әйткәнде тыңлау, әйткәнде алыу. *Ялынһаҡ та уҡмаҫ ул.* *Рәхимһеҙ илгә гиз булдыҡ.* «Буҙегет».

**УДА́Р** [1] [*рус.*] *и.* **1.** Ҡапыл яһалған атака; һөжүм. *Партизандар .. дошманға аҙаҡҡы, хәл иткес ҡаты ударҙы бирергә әҙерләнә.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Көтмәгәндә башҡа төшкән ауыр кисереш. *Беҙҙең был эш иптәштәр өсөн ҙур удар булды. Байғужа йөҙ түбән бик оҙаҡ уйланып ятты.* Д. Юлтый.

**УДАР** [2] [*рус.* ударный] *с.* **1.** Ҡапыл һөжүм итә торған. *Удар батальон. Удар төркөм.*

**2.** Хеҙмәт һәм тәртип күрһәткестәре буйынса алдынғы, өлгөлө. *Удар бригада. Удар эш.* // *Удар эшләү.*

**3.** Иң мөһим, кисектергеһеҙ, ашығыс. *Удар төҙәлеш.* / Шундай эш өсөн билдәләнгән. *Удар айлыҡ.*

**УДА́РНИК** [1] [*рус.*] *и.* 20-се йылдарҙың уртаһынан 50-се йылдар аҙағына тиклем СССР-ҙа социалистик хеҙмәттең алдынғы эшсеһе. *Эш бөтөнләй китте колхозда. Тырышалар, урам буйында .. йөрөүселәр аҙайҙы. Ғариф Иртөбәков — ударник.* Б. Бикбай.

**УДА́РНИК** [2] [*рус.*] *и. ҡар.* **сирткес** [1] 1.

**УДАРСЫЛЫҠ** *и.* Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, юғары темплы эш өсөн СССР-ҙа 20-се йылдар аҙағында — 30-сы йылдар уртаһында йәйелеп, 50-се йылдар аҙағында хеҙмәткә коммунистик ҡараш хәрәкәтенә күскән социалистик ярыш формаһы. *Әйҙә, совет, артта ҡалма ударсылыҡ барышынан!* Д. Юлтый.

**УДЕ́Л** [*рус.*] *и.* **1.** Революцияға тиклемге Рәсәйҙә батша ғаиләһе ҡулындағы биләмә. *Удел ерҙәре. Удел крәҫтиәндәре.*

**2.** Боронғо Руста кенәздең ер биләмәһе. *Удел кенәзе.*

**3.** Йән башына бирелгән ер.

**УДЕЛЬ** [*рус.* удельный] *с.* Есем һәм күренештәрҙең күләм йәки масса үлсәүенә бәйле (ғәҙәттә физик үҙенсәлеккә ҡарата). *Удель ауырлыҡ* (матдә күләме берәмегенең ауырлығы). *Удель йылылыҡ һыйышы* (1 г матдәнең йылылыҡ һыйышы). *Удель ҡаршылыҡ* (арҡыры киҫелеше 1 кв. см һәм оҙонлоғо 1 см үткәргестең ҡаршылығы).

**УДМУ́РТ** *и.* Удмуртияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (уғыр-фин телдәренең береһендә һөйләшә). *Удмурт халҡы. Удмурт ҡыҙы. Удмурт теле.*

**УДМУРТСА** *р.* **1.** Удмурт телендә. *Удмуртса яҙыу. Удмуртса һөйләшеү.*

**2.** Удмурттарға хас, удмурттар кеүек. *Удмуртса кейенеү.*

**УҘАҠ** *и.* **1.** Үҙ-ара мөнәсәбәттә булған ике кеше; пар. *Сакырыла торған ауыл ҡунаҡтары егерме уҙаҡ булғанға күрә, ике тәкәнең дә ите ҡаҙанға һалынды.* Ғ. Дәүләтшин. / Шул ике кешенең береһе (икенсеһенә ҡарата); иш. *Уҙаҡ табыу. Уҙаҡ һайлау.* ■ *Татар, башҡорт, сыуашты .. азат итәм барын, тип, уҙаҡ йыйып [Салауат] ат менгән.* «Юлай менән Салауат».

**2.** Уйнағанда икешәрләп бүленгән кешеләрҙең береһе (икенсеһенә ҡарата); иш. *Аҡ тирәк уйнағанда ла [ҡыҙ] шул егетте үҙенә уҙаҡҡа һайлай.* М. Буранғолов.

**3.** Туйҙа ҡунаҡ итеү өсөн кемгәләр беркетелгән ҡоҙа һәм шуны ҡунаҡ иткән хужа (бер-береһенә ҡарата).

**УҘАҠЛАШЫУ** *к.* **1.** Иш-иптәш булышыу; иптәшләшеү. *Ҡайғы, шатлыҡ уртаҡлашып кешеләр бар, күңел биреп уҙаҡлашып кешеләр бар.* «Әҙәби Башҡортостан», 1957, № 6.

**2.** Уйнағанда пар-пар булып бүленешеү; парлашыу.

**УҘАҠТАШ** *и.* **1.** Бергә үҫкән, дуҫ йәшәгән тиңдәш кешеләр (бер-береһенә ҡарата); иптәш. *Йылдар йылдарҙы ҡыуҙы, малайҙар үҫеп етте. Уҙаҡташтарға быйыл ҡыш ун өсөнсө йәш китте.* Ш. Бикҡол.

**2.** Бергә эш башҡарған икәүҙең береһе (икенсеһенә ҡарата).

**УЗАЛЫ-ҠАЗАЛЫ** *р.* Нисек етте шулай; тәртипһеҙ рәүештә. *Ауыл һис бер план-фәлән менән эш итмәгән. Өйҙәр, ҡаралтылар уҙалы-ҡаҙалы һалынған, ҡайныһы мәшриҡҡа, ҡайныһы мәғрипкә ҡарай.* Ғ. Дәүләтшин.

**УҘАМАН** *и.* **1.** Халыҡ алдында абруй ҡаҙанған оло йәштәге ир кеше. *Ил уҙаманы.* ■ *Ҡоҙа һыйлау тәүҙә ырыу башлығы уҙамандарға тапшырыла.* М. Буранғолов. / Шундай кешегә хөрмәтләп өндәшеү һүҙе. *[Юлай:] Уҙамандар, шулай: ил саҡырғас, ир таймай ти, барырға тура килер.* Б. Бикбай.

**2.** Балалар уйынында: уҙаҡлаштырып, ике төркөмгә бүлеп торған кеше.

**3.** *диал.* Сәкән уйынында: тупты алып киткән кеше.

● *Кесегә шәфҡәт ит, уҙаманға хөрмәт ит.* Мәҡәл.

**УҘАМТАН** *с.* Уҙырға, алға сығырға тырышыусан (ғәҙәттә атҡа ҡарата).

● *Уҙамтан ат тәртә һындырыр.* Әйтем.

**УҘАРМАНДАН** *р.* Уҙырға, алға сығырға тырышып. *Малайҙар .. һыйырҙарҙы береһен береһе уҙармандан саптырып, өйҙәренә алып ҡайта.* Һ. Дәүләтшина.

**УҘАРМАНЛАУ** *к.* Бер-беренде уҙырға тырышыу. *Уҙарманлап эшләү.* ■ *Юл буйынан уҙарманлап аттар саба.* Ә. Вәли.

**УҘҒАН** *с.* **1.** Бынан алда булған (миҙгелгә ҡарата); үткән. *Уҙған йәй. Уҙған ҡыш.* ■ *Уҙған йыл яҙ, яҙғы сәсеү мәле, һатып алдыҡ ике триер.* Ғ. Амантай.

**2.** *и. мәғ.* Үтеп киткән заман, йәшәлгән ғүмер, булған ваҡиғалар.— *Тик һин уҙғандарыңды онотма. Мин һинән кеше сығыр, тип уйлағайным. Булмағас, булмай икән.* Б. Хәсән. *Тарих битен асып, ҡисса итеп, ғибрәт өсөн һөйлә уҙғанды.* С. Кулибай.

**УҘҒАН-БАРҒАН** *с.* Үтеп, китеп барған теләһә ниндәй (кешегә ҡарата); үткенсе. *Уҙған-барған кеше.*

**УҘҒАРЫЛЫУ** *к төш. ҡар.* **уҙғарыу** 5. *Ял итеүселәрҙең көсө менән ҡисә уҙғарылды бер көндө.* Ғ. Сәләм.

**УҘҒАРЫУ** *к* **1.** Тоҡарламай ары ебәреү; үткәреү. *Эргәнән уҙғарыу.* ■ *Мин постамын, Ватан!.. Йөрәгеңә атҡан дошман уғын тәнем ҡаплар минең, уҙғармаҫ!* Р. Ниғмәти. *Алдынан ҡош уҙғармаҫ күк ҡарсыға ҡыйғырлы.. Урал тигән илем бар* (Ҡобайырҙан).

**2.** Ниҙер үтә индереп ебәреү, берәй ергә юл алдырыу; үткәреү. *Ишектән уҙғарыу. Ҡапҡанан бер кешене лә уҙғармау.*

**3.** Берәй күңелһеҙ, ауыр хәл — ваҡиғаны, сирҙе һ. б. кисереү; үткәреү. *Ҡаты ауырыуҙы уҙғарып ебәреү. Ҡышҡы һыуыҡты уҙғарыу.*

**4.** Күпмелер ваҡытты ҡайҙалыр йәки ни рәүешле итеп йәшәү, тороу; үткәреү. *Ял көнөн өйҙә уҙғарыу.* ■ *Юламан ҡарт .. бөтә ғүмерен диңгеҙ ярында уҙғарған.* З. Биишева. *Йәй көнө ни, көн дә бик оҙон була бит. Икенсе сменаны уҙғарғас та көтөргә байтаҡ ваҡыт ҡала әле.* Т. Йәнәби.

**5.** Ниндәйҙер эш, сараны һ. б. тормошҡа ашырыу, башҡарыу; үткәреү. *Дәрес уҙғарыу. Йыйылыш уҙғарыу. Концерт уҙғарыу. Май байрамын уҙғарыу. Тәжрибә уҙғарыу. Ярыш уҙғарыу.* ■ *Был кантонда төп эшем .. советтарға ҡайтанан һайлау уҙғарып, уларҙы советлаштырыу булды.* Т. Йәнәби. *Ошо урында бер аҙна самаһы туҡтап, теге малай [Күсәк бей] .. уйнап, көләп, еңеү туйы уҙғара.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**6.** *күсм.* Ниҙе лә булһа үҙенең эҙмә-эҙлегендә хыялда һ. б. барлыҡҡа килтереү, күҙ алдына баҫтырыу; үткәреү. *Хоббониса абыстай .. тормоштоң яйлы-яйһыҙ яҡтарын берәм-берәм башынан уҙғарҙы.* Т. Хәйбуллин. *Хикәйәтте тағы бер ҡат уйымдан уҙғарам.* З. Биишева.

**7.** *ҡар.* **уҙҙырыу** 1, 2.

**УҘҒАРЫШЫУ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **уҙғарыу** 5. *Концерт уҙғарышыу. Тәжрибә уҙғарышыу. Туй уҙғарышыу.*

**УҘҒЫНСЫ** *и.* Юл ыңғайы уҙып барған кеше. *[Бабай — Уралға:] Ҡырҡ йыл буйы ошо ерҙә уҙғынсыларға Тереһыу юлын күрһәтеп торам, илла әйләнеп ҡайтҡан кешене күргәнем юҡ әле.* «Урал батыр».

**УҘҘЫРЫУ** *к.* **1.** Бүтән берәүҙе үҙеңдән алға сығарыу. *Малайҙар береһен береһе уҙҙырмаҫҡа тырышып, .. йүгерҙе лә йүгерҙе.* Б. Бикбай. / Эш, ярышта алға сығарыу; бүтән берәүҙән үткәреү, алдын итеү. *[Ғаяз:] Көрән атты бер һынап ҡара әле, ҡустым. Ул ал бирә торған ат түгел. Көрән атты уҙҙырһаң, һине ризалатырмын.* Д. Юлтый.

**2.** Бүтән берәүҙән артыҡ эшләү, арттырыу. — *Юҡ, атай, башҡаларҙан бер аҙым да артҡа ҡалышырға ярамай. Уҙҙырырға тырышыу кәрәк.* Һ. Дәүләтшина. *Күпселек минән оло. Береһенән береһе уҙҙырырға теләгәндәй кейенгәндәр.* С. Агиш. *Мин — уҡыусы, мин — йырлаусы, мин — даһи. Уҙҙырырмын мин даһиҙан, билләһи!* Ш. Бабич.

**3.** *ҡар.* **уҙғарыу** 1, 4, 5. *Юлдан уҙҙырыу. Булмәгә уҙҙырыу. Түргә уҙҙырыу. Ғүмерҙе уҙҙырыу. Туй уҙҙырыу.*

**УҘҘЫРЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **уҙҙырыу** 1. *Ҡасҡан ҡуян менән уҙҙырышып, мин таш тәгәрләттем ҡуптарып.* Ф. Бикбов.

**УҘЫНЫУ** *к. диал. ҡар.* **шашыу** 1, 2.

**УҘЫР** *и.* **1.** Арбаның ҡукрәге менән артҡы күсәрен тоташтырған һыңар ағас; бил ағас.

**2.** Бүрәнә ташый торған арба; оҙон арба.

**УҘЫУ** *к.* **1.** Кем йәки нимәнеңдер янынан юл алыу; үтеү. *Тыҡрыҡтан уҙыу. Эргәнән уҙыу.* ■ *Фәхри уға ҡарамай уҙып китмәксе булғайны, ләкин малай: — Фәхри ағай, бына һиңә хат, — тип, бер ҡағыҙ ҡиҫәге һуҙҙы.* Б. Бикбай. *Көйҙәр тыңлап, ауыл урамын мин дә шул мәл көйләп уҙамын.* С. Кулибай. / Бара-бара урынды, араны артта ҡалдырыу, үтеү. *Ауылды уҙыу. Күперҙе уҙыу.* ■ *Оло урамды уҙғас, беҙҙең һалдаттар берәм-берәм тарала башланы.* Д. Юлтый. *Ҡая ла ғына ташты ай үткәндә Буранбайҙы уйлап уҙығыҙ* (Халыҡ йырынан).

**2.** Етеҙерәк хәрәкәт менән артта ҡалдырыу; үтеү. *[Ғаяз:] Ҡаҙаҡ аттарын ярты саҡрым ташлап уҙған һин булдыңмы? Беренсе бәйгене беҙгә бирҙеләр.* Д. Юлтый. *Сабырға, йүгерергә ҡалһа, уларҙан [малайҙарҙан] уҙмаһам, һәр хәлдә ҡалышмам. Шулар менән йүгерергә мине алмаҫ-*

*тармы икән?* С. Агиш. / Эш, ярышта артҡа ҡалдырыу; үтеү. *[Нина — Ғариф картка:] Уҙып китһәм, асыуланма, йәме? — Асыуланырға мин баламы ни? Кем уҙһа ла ошо колхоз өсөн файҙа инде, уҙа ғына бир.* Б. Бикбай. /Ниндәйҙер сифатта өҫтөн булыу, өҫтөн сығыу. *Батырлыкта уҙыу. Матурлыкта уҙыу. Оҫталыкта уҙыу.* /Эш, ҡылыҡта алға сығыу; үтеү. *[Эткол:] Әллә бында һеҙҙән уҙып, һеҙҙең яҙғанығыҙҙы килеп тикшереп йөрөрҙәр тиһеңме?* Ғ. Дәүләтшин. *Пәйғәмбәрҙәр нәҫеле булған менән Иблистән дә уҙған әҙәмдәр!* Ш. Бабич.

**3.** Хәрәкәт итеп, ары юл алыу (транспорт сараларына ҡарата йәки шуларҙың береһендә); үтеү. *Бөтә Агиҙелен, Димен, яланын, Өфөһөн яңғыратып, поезд уҙҙы.* С. Агиш. *Һыу сәсрәтеп, мостовойҙан етеҙ автобустар уҙа.* Ғ. Сәләм. / Хәрәкәт итеп, артабан китеү (пуля, снарядка һ. б. ҡарата). *Баш осонан снарядтар шаулап уҙа.* Д. Юлтый. *Степан кулына таш тотоп, .. һелтәп ебәргәйне, ул Мөлөк ағайҙың башына сак кына теймәй, сыжлап уҙып китте.* Т. Хәйбуллин. / *күсм.* Үҙенең әҙмә-әҙлегендә хыялда барлыҡҡа килеү, бер-бер артлы күҙ алында килеү; үтеү. *Ул [Гөлйөҙөм] алдағы бәхетенең нурын күргән кеүек йылмая. Шатлыклы уйҙар, береһенән береһе уҙып, уның күңелен тулкынландыра.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Билдәле бер сик, һыҙыҡ һ. б. аша сығыу йәки китеү. *Ишектән уҙыу. Ҡапҡанан эскә уҙыу. Перронға уҙыу.* ■ *Волость йәйләүҙән байтак кына ер. Бер нисә сакрым урман уҙырға кәрәк.* Т. Хәйбуллин. *Йәһәннәмдәр аша уҙмайынса ожмах табырбыҙ, тип ышанма!* Ш. Бабич.

**5.** Дауам итеп, артта ҡалыу, үтеү (ваҡытҡа, ваҡиғаға һ. б. ҡарата). *Ваҡыт уҙҙы. Ғүмер уҙҙы.* ■ *Ауылдың урта өлөшөндә, төн уртаһы уҙыуын белдерергә тырышкандай, ике-өс әтәс бер-бер артлы кыскырышты.* Я. Хамматов. *Аҙнагол менән Зөлхизәнең башынан ғына уҙғанмы инде бындай хәлдәр.* З. Биишева.

**6.** Ниндәйҙер эш, сара һ. б. ғәмәлдә булып, берәй төрлө тамамланыу; үтеү. *Ул [Ғәләү] үҙе кәңәшмә яртылаш уҙғас, .. аскысын иптәшенә ҡалдырҙы ла типографияға китте.* Б. Бикбай. *Саттаровтар булмағас бында, курс уҙҙы тыныс.* Ш. Бабич.

**7.** Булып туҡтау, бөтөү. *Ана япон һуғышы булып уҙҙы.* Д. Юлтый. *Бына әле генә йәшенле ямғыр уҙған. Уның артынса ҡояш балкып сыҡкан.* З. Биишева.

**8.** Билдәле бер үлсәү, сик, саманан ашыу; артыу, үтеү. *Ауырыуы төҙәлеүҙән уҙған инде.* М. Тажи. *Хужағәле ағай менән Мәхүп еңгә карт түгел, яңы кырктан уҙған.* К. Мәргән.

**9.** *-п* формаһындағы төп мәғәнәне йөкмәгән ҡылымға ҡушылып, ниҙелер эш, һүҙ һ. б. барышында башҡарғанды белдерә. *Күрһәтеп уҙыу. Һөйләп уҙыу. Әйтеп уҙыу. Яңы материал менән таныштырып уҙыу.* ■ *Яуап бирер уҙайым: тимер, корос, булатты камыр иткән — оҫталар. Оҙон-оҙон, оҙон юл, осона сыккан — сауҙагәр* (Ҡобайырҙан).

♦ **Кем уҙарҙан** алға сығырға тырышып, ярышып. *Кем уҙарҙан ашау. Кем уҙарҙан йүгереү.*

**Ҡулдан уҙыу** кемдеңдер эше, мөнәсәбәте аша үтеү. *Минең кулдан күп мал уҙҙы.* **Уҙа барһа** (*йәки* **китһә**) күп тигәндә, иң күбе. *Беҙ түбәнге курста сакта ла кумәкләп торманык. Өсәү, уҙа барһа дүртәү тора инек.* Н. Ҡәрип. **Уҙып тыуған шул уҡ аша тыуған** (*кар.* тыуыу). **Эш уҙған.** *кар.* **эш.**

● *Айырылған ил аҙыр, кушылған ил уҙыр.* Әйтем. *Ишеге ямандың түренә уҙма.* Әйтем. *Өйгә еткәс, эт уҙа.* Әйтем.

**УҘЫШ** *и. спорт.* Ат сабыштырыу, йүгереү һ. б. бәйгеһендә һәр төркөмдөң айырым сығышы. *«Башкирия» спортсмендары бөтә уҙыштарҙа ла һәйбәт сығыш яһаны.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 23 июнь.

**УҘЫШЛЫ** *и. диал.* Йүгереш.

**УҘЫШТЫРЫУ** *к.* Үҙ-ара йүгерештереү, тиҙлектә ярыштырыу. *Ипподромда юрттактарҙы уҙыштырыу.*

**УҘЫШЫУ** *к.* Үҙ-ара тиҙлектә ярышыу. *Саңғыла ун километрға уҙышыу.* ■ *Батша кыҙын алам тигән кеше быға тикләм йүгерештә берәүгә лә ал бирмәгән бер йүгерек әбей менән уҙышырға тейеш икән* (Әкиәттән).

**УЖАР** *и. диал.* Ажар. *Ужар сәсеү.* ■ *Ужарынан халыктың башын ергә эйҙереп, Ҡатил батша килгән, ти.* «Урал батыр».

**УЖАРЛАНЫУ** *к. диал.* Ажарланыу.

**УЖАРЛЫ** *с. диал.* Ажарлы. *Ужарлы кеше. Ужарлы ел.*

**УЖАРЫУ** *к. диал.* Ажарланыу.

**УЖАУ** *и. диал.* Үҙһүҙле, сәмсел.

**УЖЫ** *и. диал.* Үс, кенә.

**УЖЫЛДАУ** *к. кар.* **выжылдау.**

**УЖЫЛЫ** *с. диал.* Кенәсел.

**УЖЫМ** [*рус.* озимь] *и.* **1.** Көҙ сәселгән иген. *Ужым ашлығы. Ужым арышы. Ужым бойҙайы. Ужым баҫыуы. Ужымды ашлау. Ужым сәсеү.* ■ *— Баҫыу кәртәһе тоторға! Юғиһә, ужымға мал сыға башланы, — тип кыскырҙы староста.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Шундай иген билгән баҫыу. *Арыш ужымы. Бойҙай ужымы.*

♦ **Ужым быҙауы** йыуаш, йомшаҡ, экрен, ҡулынан эш килмәгән кешегә әйтелә.

**УЖЫМЛАУ** *к.* Түгелгәндән көҙ көнө шытыу. *Ужымлап үҫеү. Ужымлаған бойҙай.*

**УЖЫМЛАШТЫРЫУ** *к.* Ужымға, көҙ сәсеүгә яраҡлаштырыу. *Бойҙайҙы ужымлаштырыу.*

**УЖЫМЛАШЫУ** *к.* Көҙҙән сәсеүгә яраҡлашыу. *Ужымлашкан бойҙай.*

**УЖЫТ** *с. диал.* Айбарлы.

**У́ЗЕЛ** [1] [*рус.*] *и.* **1.** Тимер юлдарҙың төрлө яҡтан килеп, бергә ҡушылған ерендәге ҙур станция. *Тимер юл узелы.*

**2.** Механизмдың, техник ҡоролманың үҙ-ара бәйләнешле бер нисә деталдән торған өлөшө. *Улар [механизаторҙар] агрегаттың узелдарын көйләп бөткән.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 24 октябрь.

**3.** *кар.* **үҙәк** 5. *Комбайндар ремонтлау узелы. Элемтә узелы.*

**У́ЗЕЛ** [2] [*рус.*] *и.* Ҡараптың йөрөш тиҙлеген үлсәү берәмеге (сәғәтенә бер миль, йәғни 1,87 км).

**УЗУРПА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* Берәү ҡулындағы власты йәки нимәгәлер булған хоҡуҡты законһыҙ тартып алып үҙләштергән кеше.

**УЗУРПА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* Берәү ҡулындағы власты йәки нимәгәлер булған хоҡуҡты законһыҙ тартып алып үҙләштереү хәле.

**УЗУРПАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **узурпациялау.**

**УЗУРПАЦИЯЛАУ** *к.* Берәү ҡулындағы власты йәки хоҡуҡты законһыҙ тартып алып үҙләштереү.

**УЙ**[1] *и.* **1.** Бөтә тормош хәленең кеше аңындағы сағылышы. *Ауыр уй. Татлы уй. Тәрән уй.* ■ *Бөгөн башымдан төрлө уйҙар үтте.* С. Агиш. *Хәсрәт кенә тотоп, ялҡын йотоп, уй уйлаған ирҙә йоҡо юҡ* (Халыҡ йырынан).

**2.** Аңды биләп алып торған нәмә; хыял. *Уйға батыу. Уйға ҡалыу. Уйға төшөү.* ■ *Булат башҡа һүҙ өндәшмәне, .. ниндәйҙер уйға сумды. Яҡуп та хыялға бирелде. Уның уйҙары бөгөн булып үткән хәлдәр тирәһендә уралды.* Б. Бикбай. *Сәлимәне онота алмай мәңгелек ауыр уйҙарға тарыған Сәйет һағышлы йыр менән күңелен бушҡартә торған булған.* Ә. Вахитов.

**3.** Нимәгәлер булған баһалы ҡараш; фекер. *[Нәзирә:] Сәйҙел иптәш, уйығыҙ хата кеше тураһында.* Ғ. Сәләм.

**4.** Берәй нәмә тураһында барлыҡҡа килгән ниәт, план. *Башта йөрөткән уй. Башҡа килгән уй. Уҫал уй. Уйҙы ныҡытыу. Уйҙы әйтеү. Уй короу. Яуыз уйлы кеше.* ■ *[Үмәр:] Әллә, әсәһе, урын-яйы тура килһә, баланы урынлаштырып ҡуябыҙмы, тием. Һин был турала уй йөрөткәнең бармы?* Һ. Дәүләтшина. *Сынтимер .. үҙ иленә ҡайтмаҡсы булды, ти. Был уйын ҡыҙ менән баташаға ла белдерҙе, ти* (Әкиәттән).

● *Өйҙәге уй юлға ярамай.* Мәҡәл.

**УЙ**[2] *и.* Һыҙылып киткән түбән ер; уйһыу, уяҙ. *Аҡты һыуҙар, ҡайҙа уй бар — шунда һыуҙар тулдылар.* Ш. Бабич. *Яҙ миҙгелкәйҙәре еттениһә, уйҙан уйға аға ҡар һыуы* (Халыҡ йырынан).

**УЙ**[3] *ымл.* **1.** Ҡапыл ҡурҡҡанда, һиҫкәнгәндә әйтелә. *[Булат:] Уй, битемә эре ямғыр тамсыһы тып итеп ҡалды.* К. Кинйәбулатова.

**2.** Көйөнгәндә, һыҙланғанда, йәлләгәндә әйтелә. *Уй, башым! Ярылып ҡына килә. Уй, баламды! Ҡулы ауыртҡан бит!*

**3.**Ҡыуанғанда, һоҡланғанда, кинәнгәндә әйтелә. *[Батыр:] Уй ир икәнһең, Ҡорманбай!* Т. Хәйбуллин.

**4.** Аптырап, ҡаушап ҡалғанда әйтелә. *[Ҡыҙ:] Уй, апай, нимә генә уйлайым икән!* С. Агиш.

**5.** Асыуланғанда, әрләгәндә әйтелә. *[Алламорат:] Уй, арҙа ҡаҙаҡ, аңышайма, эшеңде ҡара.* Һ. Дәүләтшина.

**УЙҒАН: уйған ебәк** *диал.* сыңарсай бармаҡтың бармаҡ һанап уйнағанда әйтелә торған исеме; бәләкәй бәбәк.

**УЙҒАНЫУ** *к. иҫк.* Уяныу.

**УЙҒУР** *и. кар.* Уйғыр.

**УЙҒЫЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **уйғылау.**

**УЙҒЫЛАУ** *к.* Тош-тош ерҙән уйыу. *Боҙ өҫтөн снарядтар уйғылап бөткән.*

**УЙҒЫЛДЫ-СУЙҠЫЛДЫ** *с. диал.* Соҡорлосаҡырлы.

**УЙҒЫР** *и.* Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан һәм Ҡытай Халыҡ Республикаһында йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (төрки телдәрҙең береһендә һөйләшә). *Уйғыр халҡы. Уйғыр ҡатыны. Уйғыр теле.*

**УЙҒЫРСА** *р.* **1.** Уйғыр телендә. *Уйғырса һөйләшеү.*

**2.** Уйғырҙар кеүек, уйғырҙарға хас. *Уйғырса кейенеү.*

**УЙҘЫҠ** *и.* Бәләкәй генә булып уйылып, соҡорланып торған урын.

**УЙҘЫҠЛАНЫУ** *к.* Уйҙыҡҡа әйләнеү, уйҙыҡ булыу. *Уйҙыҡланып тороу.*

**УЙҘЫҠЛАУ** *к.* Уйҙыҡ яһау. *Күмер төшөп, күп ерен уйҙыҡлап яндырған артһыҙ ултырғыс.* «М. Ғафури тураһында замандаштары», 1961.

**УЙҘЫҠ-УЙҘЫҠ** *с. диал.* Уйым-уйым. *Йәм-йәшел урманлыҡ араһында уйҙыҡ-уйҙыҡ һарғылт баҫыуҙар күренә.* Ғ. Ибраһимов.

**УЙҘЫРМА** *и.* Ысын булмаған, уйлап сығарылған нәмә. *Бөтә әкиәт тә уйҙырмаға, йәғни булмағанды, юҡты һөйләүгә ҡоролған.* М. Минһажетдинов.

**УЙҘЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **уйыу.** *Яға уйҙырыу.*

**УЙҠАҘ** *и. диал.* Уйһыу, уяҙ.

**УЙҠАНЫУ** *к. иҫк.* Уяныу. *Егетте күргәс, йәнем уйҡанды. Ҡулдарын һалғас, ғаҡылым болғанды* (Бәйеттән).

**УЙҠЫЛ** *и.* Соҡорланыңҡырап торған түбән урын. // *Уйҡыл урын.* ■ *Тау үркәсенә менеп, аръяҡҡа ауышҡас, ауыл күҙҙән юғалды... Ул бер уйҡыл эсендә ятып ҡалды.* Ж. Кейекбаев.

**УЙҠЫЛЛАНЫУ** *к.* Уйҡылға әйләнеү, уйҡыл булыу. *Айбулат Гөлйөҙөмдөң .. эскә һурылып, уйҡылланып торған сикәләренә ҡарап һоҡланды.* Һ. Дәүләтшина.

**УЙҠЫЛЛАУ** *к.* Уйҡыл яһау, уйҡыл итеү.

**УЙҠЫМ-УЙҠЫМ** *с. диал.* Уйым-уйым.

**УЙҠЫТ** *и. диал.* Уйпат.

**УЙЛАМАҒАНДА** *р.* Абайламаҫтан, көтмәгәндә. *Бер көндө уйламағанда, .. күктән төшкән кеүек, Тайфуров үҙе Ҡарамалыға килеп сыҡты.* М. Тажи.

**УЙЛАМАҪТАН** *р. кар.* **уйламағанда.**

**УЙЛАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Уйға һалыу, уйға ҡалдырыу. *Уйылып ҡына аҡҡан. Уйыл һыуы уйландыра уйсан да ирҙәрҙе* (Халыҡ йырынан).

**2.** *әйһ. ф. кар.* **уйланыу.** *Уйландыра, моңландыра һандуғаслы яҙғы төндәрҙә* (Халыҡ йырынан).

**УЙЛАНЫУ** *к.* Үҙ алдыңа ниҙер уйлау; уйға бирелеү, уйға ҡалыу. *Аҡъял батыр.., хәҙер ни эшләргә инде тип, уйланып ултырған-ултырған да аяҡ тартҡан яҡҡа сығып киткән* (Әкиәттән).

**УЙЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **уйлау.** *Әллә ниҙәр һиҙҙерә ул, әллә ниҙәр уйлата.* Ш. Бабич.

**УЙЛАУ** *к.* **1.** Ниҙе лә булһа аңдан кисереү. *Уйлап алыу. Уйлап еткереү. Уйлап ҡарау. Уйлап ҡуйыу. Уйлап сығыу.* ■ *Уйламаҫҡа кәрәк әле. Бөгөн көнө буйы уйлап та баш ҡатты.* С. Агиш. *Йә, сеү инде, Зәйнәп. Уйлап ҡара, дәүләт һине ниңә уҡытты.* Ғ. Сәләм. / Ниҙелер асыҡлау, белеү өсөн уй, фекер йөрөтөү. *Ҡойҙом һиңә бер йомаҡ. Йә, нимә ул? Уйлап тап.* Ғ. Амантай.

**2.** Ниндәйҙер карашта, фекерҙә булыу. *[Инспектор:] Шәхми ағай,.. мин һине арыу ғына кеше тип уйлаһам, һин әллә ни һөйләйһең.* Т. Йәнәби. / Ниҙер хаҡында бер төрлө фекергә килеү, фараз итеү. *Ҡатын-ҡыҙҙар баҫыла төштө. Улар Тимерҙе ят кеше, районадан килгән вәкил тип уйланы булһа кәрәк.* Б. Бикбай.

**3.** Күңелдән ниәт, хыял ҡороу. *Ул [көтөүсе] үҙенең ярһыған йөрәген ҡурай тауышы менән баҫырға уйлағандыр.* Б. Ишемғол.

**4.** Кем йәки нимәлер хаҡында хәстәрлек итеү; кемде йәки нимәнелер ҡайғыртыу. *Баланы уйлау.* ■ *Хәҙер уға тамаҡ, өҫ-башты уйламай, һөйгән эшенә йәне, йөрәге менән бирелергә мөмкин.* З. Биишева.

♦ **Бер уйлағанда** (*йәки* **уйлаһаң)** *инш.* икенсе бер күҙлектән ҡарағанда, былай ҡарағанда. *Бер уйлағанда, беҙгә бер пуля ла атырға ярамай. Ә беҙ, аңралар, .. ут эсендә йөрөйбөҙ.* Д. Юлтый. **Уйлап сығарыу** 1) булмағанды сығарыу. *Уйлап сығарып һөйләү;* 2) *ҡар.* **уйлап табыу** 2. **Уйлап табыу** 1) сара, юл табыу. *[Айбулат приказчиктың] яғаһынан тартып һелкеп тартышҡыһы килде, ләкин ул ваҡытта был бәндә тағы ла бер этлек уйлап табыр ҙа ҡалған аҡсаны тартып алып ҡуйыр, тип өндәшмәне.* Һ. Дәүләтшина; 2) яңы нәмә асыу. *Самолётҡа яңы тип ағыулыҡ уйлап табыу.*

● *Инереңдән элек сығырыңды уйла.* Әйтем. *Уйламай һөйләгән ауырымай үлгән.* Мәҡәл.

**УЙЛАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **уйлау** 1, 2. *Уйлашып, фекерләшеп, кәрәк икән тормошта йәшәргә бергәләшеп.* Ғ. Амантай.

**УЙЛЫҠ** *и. диал.* Уйһыу. *Уйлыҡтарҙа үҫкән сәскәләр өҙөлөп ергә ятты.* Ш. Шәһәр.

**УЙМА** [1] *и.* Уйылып, соҡорайып торған урын. *Бит уймаһын уйнатып, күләс йөҙөн балҡытып, .. һөйләй икән Айһылыу.* «Урал батыр». *Тау бүйҙәре уймалы, баҫып тороп булманы* (Халыҡ йырынан).

**УЙМА** [2] *и. диал.* Бешмә.

**УЙМАҠ** [1] *и.* **1.** Тегенгәндә энәне этеп сәнсеү өсөн бармаҡҡа кейә торған нәмә. *Еҙ уймаҡ. Күн уймаҡ.* ■ *Гөлнәфисә күлдәк тегә, бармағында уймағы* (Халыҡ йырынан).

**2.** Бәләкәс кенә булып соҡорланып торған түңәрәк. *Бит уймағы.* ■ *Болот араһынан күренгән зәңгәр күк уймағында һаралйып ҡош талпына.* С. Ильясов.

♦ **Уймаҡ ауыҙ** бәләкәй генә, түңәрәк ауыҙ. *Мәрйенбикә, иренең — мәрйен, ауыҙың — уймаҡ.* Ш. Бабич. **Уймаҡ сәскә** (*йәки* **үлән)** ваҡ ҡына ҡыңғырау сәскәле оҙонса япраҡлы дарыу үләне.

**УЙМАҠ** [2]: **уйындан уймаҡ сыға** *йәки* **уйындан уймаҡ, башыңа туҡмаҡ** уйындан, шаярыуҙан башлап, талаш, һуғыш менән бөтөргән саҡта әйтелә.

**УЙМАҠЛАНДЫРЫУ** *к.* Уймаҡ [1] (2 мәғ.) һымаҡ итеү. *[Рәхимә] ауыҙының ике яҡ ситен уймаҡландырып, мине яндырырға теләгән ҡараш менән: «Бер аҙым да атламайһың!» — ти.* Ғ. Хәйри.

**УЙМАҠЛАНЫУ** *к.* Уймаҡ [1] (2 мәғ.) һымаҡ булыу. *Күлгәндә уймаҡланып киткән бит алмалары, алһыу йөҙө, матур текә танауы Рәкиәне сибәрҙәрҙән сибәр итеп күрһәтә.* И. Ғиззәтуллин.

**УЙМАҠЛАТЫУ** *к. ҡар.* **уймаҡландырыу.**

**УЙМЫР** *и.* Ярым түңәрәк ҡасау.

**УЙНАҠ** *с.* **1.** Уйнап, йүгереп торған; шаян. *Уйнаҡ тай.* ■ *Кил, уйнаҡ ел, беҙгә уйнап кил, кил бергәләп тормош төҙөргә.* Ғ. Амантай.

**2.** Уйнап, көлөп торған; шат. *[Айбулаттың күҙҙәре] ҡайһы саҡта уйнаҡ, ҡайһы уйсан.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Уйнауға, шаярыуға ҡоролған. *Уйнаҡ һүҙ.* ■ *Был китап .. уйнаҡ тел менән яҙылған.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 31 декабрь.

**УЙНАҠЛАТЫУ** *к.* **1.** *йөкм. ҡар.* **уйнаҡлау** 1. *Тегеләр ике көндән .. ҡара йылтыр айғырҙы уйнаҡлатып алып та ҡайтты.* Р. Солтангәрәев. *Йүгерүҙәндең бүйҙәрынан уйнаҡлатып аҫау ат, ирек яулап, яуға уҙған батыр егет Салауат.* Ф. Бикбов.

**2.** Үрле-түбәнле, уңлы-һуллы һикертеү, сайҡалдырыу. *Ҡулбаштарҙы уйнаҡлатыу.* ■ *[Хәтмулла] киң яурынын уйнаҡлатып: «Ул тиклем бик өшәнгән дә күренмәйем икән әле!» — тип ҡыуанып ҡуйҙы.* Д. Исламов. *Кескәй һалды тулҡындар һыу өҫтөндә уйнаҡлата.* Ғ. Әмири. *Соҡор-саҡырлы юл арбаларҙы ауҙарырҙай булып уйнаҡлата.* Ә. Чаныш.

**УЙНАҠЛАУ** *к.* **1.** Елеп, һикереп уйнау. *Инәһен имеп туйған быҙау уйнаҡлап шаяра башланы.* Д. Юлтый. *Ҡола ҡашҡа уғыҙ йүгеректе ярты саҡырымға артта ҡалдырып, колон кеүек уйнаҡлап, алдан килде.* С. Кулибай. / Көс, дәрт, яҡшы кәйефтән ашҡыныу (күберәк ҡатын-ҡыҙға ҡарата). *[Иҙел:] Ҡымыҙ уйнаҡлап торған кешене ярата, үҙе лә уйнаҡлата.* Ш. Насыров. *Шәрги .. башын артҡа ташлап көлдө лә уйнаҡлап, өйөнә табан атланы.* Я. Вәлиев.

**2.** Дәрт йәки нәпсенән теґеләй-былай хәрәкәтләнеү (күҙгә, башҡа ҡарата). *Буяныуына, күҙҙәренең уйнаҡлауына, кейеменә күҙ һалыу менән уҡ ҡатындың һөнәрен билдәләп бул[а ине].* И. Насыри. *Ҡыҙҙар араһында Фәриә тигәне, күҙе-башы уйнаҡлап, кешенең бер һүҙенә биш яуап ҡайтарып тора.* Н. Мусин.

**3.** Үрле-түбәнле, уңлы-һуллы һикереү, сайҡалыу. *Хозурланып киткән сиған ҡатындарының ҡулбаштары уйнаҡлай башланы.* Ғ. Бирзин.

♦ **Йөрәк** (*йәки* **күңел) уйнаҡлау** берәй көслө тойғонан елкенеү. *Аҡназарҙың күңеле уйнаҡлай, ләкин быны башҡаларға һиҙҙермәҫкә тырыша.* Б. Хәсән. *Кемдер инде. Быны күргәс, малайҙың йөрәге уйнаҡлап ҡуйҙы.* Р. Ғабдрахманов.

● *Арыҡ мал яҙға сыҡһа, уйнаҡлар.* Әйтем.

**УЙНАҠЛАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **уйнаҡлау** 1. *Уйнаҡлашып саба, ана, тайҙар.* Р. Ғарипов.

**УЙНАҠСЫЛ** *с.* Уйнаҡлап торған, шаян. *Уйнаҡсыл күҙле, ҡыҙ икенсе булмаға ингәс тә .. Билалды күрһәтте.* А. Таһиров.

**УЙНАҠЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **уйнау.** *Уйналған уйын.*

**УЙНАП-КӨЛӨҮ** *к.* Кәйеф-сафа ҡороу, күңел асыу.— *Әлбиттә, эштән һуң уйнап-көлөп, ял итергә кәрәк.* М. Тажи. *Тауға ғына менһәң, иҫкә*

*төшә дуҫ-иш менән уйнап-көлгән ер* (Халыҡ йырынан).

**УЙНАТЫУ** *ҡ.* **1.** Берәй төрлө шөғөл, уйын менән әүрәтеү. *[Балалар баҡсаһында] балаларҙы ашаталар, уйнаталар, ваҡытында йоҡларға һалалар.* Б. Бикбай. *Ҡаҙ өйрәге, аҡҡошо типһендәге күлендә бәпкәләрен уйнатып, ҡыуанышып сыуалышҡан Урал тора алдында.* «Аҡбуҙат».

**2.** Ниҙелер уйынсыҡ итеп уйнау. *Ҡурсаҡ уйнатыу.* ■ *Бала йүгерә әсә алдында, ҙур туп уйната.* Ғ. Сәләм.

**3.** *күсм.* Кемделер ҡыҙыҡ итергә теләп шаярыу; шаяртыу. *Еңгәләрҙе уйнатыу.* ■ *Иренеңде ослайтаһың, уйнатып һүҙ ҡушһам да.* А. Игебаев.

**4.** Төрлөсә тиҙ-тиҙ хәрәкәт иттереү; йөрөтөү. *[Хәтирәнең] янында гына мускулдарын уйнатып, Ғимай баҫып тора.* Ф. Иҫәнғолов. *Баев .. баш өҫтөндә ҡылысын уйнатты.* Ә. Ихсан.

**5.** Сағылдырып ялтыратыу, ялт-йолт иттереү. *Нур уйнатыу. Көҙгө ҡояш монар уйнатып йылмая, күңелде йыуата.*

**6.** Музыка ҡоралында көй сығарыу. *Гармун уйнатыу. Скрипка уйнатыу.* ■ *Алпамыша сарыҡ ҡуныҫынан ҡурайын тартып сығарып, моңло көйҙәрҙе уйнатып ебәрҙе, ти.* «Алпамыша».

◆ **Ат уйнатыу** яҡшы атты ҡупшы итеп йөрөтөү; бейетеү. *Салауат килә гәскәр башында ат уйнатып, Урал буйлатып* (Халыҡ йырынан). **Буран** (*йәки* **ел, ел-буран, саң**) **уйнатыу** *шул уҡ* **ҡойон уйнатыу** (*ҡар.* **ҡойон**). *Елһә [Аҡбуҙат] ҡоштай елпенеп, артында саң уйнатҡан.* «Аҡбуҙат». **Күңелде уйнатыу** *диал.* күҙҙе ҡыҙҙырыу, көнләштереү. *Ул [батыр] көмөш билгауҙы бик ятатып быуған, һәр майҙанда байҙар күңелен уйнатҡан* (Әкиәттән). **Һүҙ уйнатыу** *ҡар.* **һүҙ.**

**УЙНАУ** *ҡ.* **1.** Ҡыуаныс, йыуаныс бирә торған төрлө шөғөл менән булыу. *Ат булышып уйнау. Баҫтырышып уйнау. Ашыҡ уйнау. Биш таш уйнау. Йәшенмәк уйнау. Ҡурсаҡ уйнау. Туп уйнау.* ■ *Ялбыр ҡара малайҙар таҡыя тибеп, йүгереп уйнайҙар.* Ғ. Амантай. / Елеп, һикереп, осоп-төшөп етеҙ хәрәкәттәр яһау (тереклектәргә ҡарата). *Һыуҙа балыҡ уйнай.* ■ *Арҡа өҫтәрендә ат уйнай, түбә өҫтәрендә төлкө уйнай* (Халыҡ йырынан).

**2.** Спорт йәки шуның кеүек башҡа нәмә менән мәшғүл булыу. *Бильярд уйнау. Кәрт уйнау. Лото уйнау. Хоккей уйнау. Футбол уйнау. Шахмат уйнау.*

**3.** Хәрби күнекмә башҡарыу. *Ҡыҙарып ҡояш сыҡҡанда, һалдат уйнай теҙелеп* (Бәйеттән).

**4.** Ҡауышҡан осорҙа өйрөләп-сөйрөләп инә ҡошто әүрәтеү (ҡайһы бер ҡошҡа ҡарата). *Ҡор уйнай. Һуйыр уйнай.*

**5.** Берәй нәмәне уйынсыҡ кеүек күреү, маҡсатһыҙ өйрөлтөү, төрлөсә ҡыландырыу. *[Клава] ҡулындағы, муйынындағы алтын сылбырҙары менән уйнай-уйнай, тағы күп итеп ниҙер һөйләнде.* Һ. Дәүләтшина.

**6.** *күсм.* Кем йәки нимәнелер мәрәкә күреп мөғәмәлә итеү; шаярыу. *Ҡыҙҙар менән уйнау. Уйнап әйтеү. Ут менән уйнау.*

**7.** Берәй ҡорамал менән еңел, бер ниндәй ауырлыҡһыҙ эш итеү, шулай уҡ еңел, етеҙ хәрәкәт итеү (ҡорамалдың үҙенә ҡарата). *Сабир алды-ялды белмәй эшләй. Ҡулдарында көрәк уйнап тора.* Ғ. Ибраһимов. *[Урал батырҙың] ҡылысы, йәшен уттары сығарып, уйнап ҡына торҙо, ти.* «Урал батыр». / Ҙур көс менән шашып хәрәкәт итеү (тәбиғәттәге күренешкә ҡарата). *Буран уйнай. Тулҡын уйнай.* ■ *Ҡапыл ел ҡупты, ҡойон уйнап, дауыл ҡутәрелде.* М. Тажи.

**8.** Сағылып ялтырау, ялт-йолт итеү (нурға, яҡтылыҡҡа һ. б. ҡарата). *Монар уйнай.* ■ *Ай нуры уйнап торҙо, күлгә төшөп.* Ш. Бабич. *Нәжәгәйҙәр уйнай ялт та йолт, уйнай атҡан утлы уҡ булып.* С. Кулибай. / Бер сағыу, бер тоноҡ булып хәрәкәт итеү, ем-ем итеү (йондоҙға һ. б. ҡарата). *Йылтлап уйнай күктә йондоҙҙар, ахыры осҡондарға дуҫ улар.* Ғ. Амантай. / *күсм.* Ҡыуаныс, шатлыҡ һ. б. йөҙҙә асыҡ булып сағылыу, беленеү. *[Ҡатын] иң элек Анна Константиновна менән күреште. .. Йөҙө ҡапыл бағыы етдилеген аҙ ғына юғалтып, уйнап ҡуйҙы.* С. Агиш. *Ҡасимдың да йөҙөндә нур уйнай ине.* Н. Мусин.

**9.** Ҡуҙғыған, эшмәкәр хәлдә булыу (тойғо, фекер, хыялға һ. б. ҡарата). *Уйҙар оса, уйнай хыял, әллә ҡасанғы бабайҙарҙың йырын тыңлай хыял.* Ш. Бабич.

**10.** Музыка ҡоралында көй башҡарыу. *Ҡурай уйнау.* ■ *Кәмәгә тейәлгән ҡыҙҙар, егеттәр гармун, мандолин уйнап, эргәнән үтеп тора.* Т. Йәнәби. / Көй көйләү (музыка ҡоралына ҡарата). *Тик патефон ғына уйнай ине «Ҡышҡы кис»те өҫтәл өҫтөндә.* Ғ. Сәләм.

**11.** Күмәк йыр-бейеү менән мәшғүл булыу. *Түңәрәк уйнау.* ■ *Гармунға ҡушылып, шау-шыу килеп уйнап йөрөгән йәштәр уны [Сәгиҙәне] күреү менән таралыша һалып бөттө.* М. Тажи. / Сәхнә әҫәрен йәки әҫәрҙәге ролде башҡарыу. *Спектакль уйнау. Әпкәләйҙе уйнау.* ■ *Сәхнәлә .. студент яҙған инсценировканы уйнайҙар.* Б. Бикбай.

◆ **Йөрәк уйнау** йөрәк тулыу. **Күҙ уйнау** *ҡар.* **күҙ. Күңел уйнау** *ҡар.* **күңел. Ҡул уйнау** 1) етеҙ эшләү. *Бабайҙың ҡулына күҙ эйәрмәй, ҡулы уйнап тора.* М. Тажи; 2) аҫтыртын эш итеү. *[Тимер:] Минеңсә, бында кемдеңдер бысраҡ ҡулы уйнай.* Б. Бикбай. **Роль уйнау** *шул уҡ* **урын тотоу** (*ҡар.* **урын**). **Уйнап ҡына** еңел, көс һалмай ғына. *Уйнап ҡына алып бара ине ул [Зөлхизә] был эштәрҙе.* З. Биишева.

● *Бәҫ кәҙерен белгән ҡулда ҡайсы уйнамаҫ, ат кәҙерен белгән ҡулда ҡамсы уйнамаҫ.* Әйтем. *Илар бала атаһының һаҡалы менән уйнар.* Мәҡәл. *Уйнап һөйләһәң дә уйлап һөйлә.* Әйтем.

**УЙНАШ** *и.* Никахһыҙ йәшерен енси мөнәсәбәт. *Уйнаш итеү.* ■ *[Шәрәфел:] Айһылыу менән Юлай тыҡрыҡта ҡосаҡлашып, төнө буйы ултырған, ти. [Моғолой:] Тфү, кәнтәй мәрйә! Мин уны бына тигән егеткә димләп йөрөһәм, ул уйнаш итеп йөрөй икән!* С. Мифтахов. **Уйнаштан тыуған** 1) никахһыҙ йәшерен яҡынлыҡтан тыуған; тыуma; 2) әрләгәндә әйтелә.

● *Татыу өйгә уйнаш инмәй.* Мәҡәл.

**УЙНАШЛЫҠ** *и. ҡар.* **уйнаш.** *Уйнашлыҡ итеү.*

**УЙНАШСЫ** *и.* Никахһыҙ йәшерен енси мөнәсәбәткә ингән кеше.

**УЙНАШЫУ** *к. урт. кар.* **уйнау** 1.

**УЙПАҘ** *и. диал.* Уйпат.

**УЙПАТ** *и.* Түбәнерәк булып ятҡан киң урын; уйһыу. *Тәрән уйпат. // Уйпат ер. Уйпат урын.* ■ *Улар [Гөлбикә апайҙар] беҙҙән айырылғас, бер уйпатҡа төшә, .. баштары ғына күренә башлай.* Д. Юлтый. *Уйпаттарҙа карҙар ат бауырынан.* Б. Бикбай.

**УЙПАТЛЫҠ** *и.* Уйпат ер. *Ямғыр туҡталып торған арала уйпатлыҡтарҙан томан ҡалҡа, ер өҫтөн йән өшөткөс еүешлек ҡаплап ала.* М. Хәйҙәров.

**УЙПЫ** *и. диал.* Уйпат. *Уйпыларҙы умырзая сәскәләре ҡаплаған ине.* А. Игебаев.

**УЙРА** *и. диал.* Уйпат. *Урғаҙаһын буйы уйра-уйра, уйра ерҙә үлән ҡуйыра* (Халыҡ йырынан).

**УЙРЫҠ** *и. диал.* Уйпат. *Ҡыҙҙар бер уйрыҡта туҡталды ла ҡып-ҡыҙыл булып бешкән ер еләктәрен ашығып-ашығып тирергә тотондо.* Ш. Шәһәр.

**УЙСАН** *с.* Уйға бирелеүсән, күп уйлаусан. *Уйсан кеше.* ■ *Мин Ямалды күҙ алдына шулай килтерәм. Бер ҡарағанда ул һағышлы, уйсан, икенсе тапҡыр балаларса ваййымһыҙ .. кеүек.* М. Тажи. *Уйылып ҡына аҡҡан Уйыл һыуы уйландыра уйсан ирҙәрҙе* (Халыҡ йырынан). /Тәрән уйҙы сағылдырған. *Уйсан йөҙ. Уйсан күҙ. Уйсан ҡараш.* ■ *Хасбулат олатай .. һалмаҡ, уйсан ғына тауыш менән һөйләп китте.* З. Биишева.

**УЙСАНЛАНЫУ** *к.* Уйсанға әйләнеү, уйсан булыу. *Самат тағы нығыраҡ үҙгәрҙе. Ул уйсанланып китте.* К. Мәргән. *Был кәҙәрле моңһоу түгел инем, уйсанланды ҡуңыр күҙҙәрем.* А. Игебаев.

**УЙСАНЛЫҠ** *и.* Уйсан булыу хәле. *Уйсанлыҡҡа бирелеү.* ■ *Айбулат Гөлйөҙөмдөң .. ҡатынлыҡ, әсәлек тойғолары менән килә торған мәғәнәле уйсанлыҡ өҫтәлеп матурайған күҙҙәренә .. ҡарап һоҡланды.* Һ. Дәүләтшина. *Уйсанлыҡта, иңһеҙлектә диңгеҙ менән шундай тиң һеҙ.* Б. Бикбай.

**УЙТ** *ымл.* Еңелсә орошҡанда, шелтәләгәндә әйтелә. *[Зәлифә — Мостафаға:] Уйт, маҡтанған булаһың.* Һ. Дәүләтшина.

**УЙ-ТОЙҒО** *и. йыйн.* Бөтә булған эске хис, кисереш. *Ямалдың йөрәгендә төйөрләнеп ятҡан уй-тойғолары .. тышҡа бәреп сыҡҡан.* М. Тажи.

**УЙТЫҠ** *и. диал. кар.* **соҡор** [1] 5. *Бит уйтығы.*

**УЙ-ФЕКЕР** *и. йыйн.* Уйлаған бөтә уй һәм фекер. *Уй-фекер туплау.*

**УЙ-ХИС** *и. йыйн. кар.* **уй-тойғо.** *Уй-хис уятыу.*

**УЙ-ХӘСРӘТ** *и. йыйн.* Күңелдәге бөтә булған ауыр уй һәм хәсрәт. *Уй-хәсрәттәр тотоп, ялҡын йотоп, ғүмер иткән ирҙә йоҡо юҡ* (Халыҡ йырынан).

**УЙҺЫЛ** *с.* Уй [2] рәүешендәге, уйға тартым. *Йылғаның уң яҡ яры текә, таулы, һул яҡ яры уйһыл, түгәйлек.*

**УЙҺЫУ** *м.* Түбәнерәк булып ятҡан ҙур, иркен ер. *Тәрән уйһыу. // Уйһыу ер.* ■ *Тын күлдәргә төшкән аҡҡошмо ни уйһыуҙарҙа ята аҡ томан.* Ғ. Сәләм.

**УЙҺЫУЛЫҠ** *и.* Уйһыу урын, ер. *Тау култыҡтары, уйһылыҡтарҙан тәгәрәшеп төшкән ҡар һыуҙары .. Ташлыйылғаға барып ҡушылды.* М. Тажи. *Улар [балалар] йылға ярынан бирерәк, ҡары иремәй ятҡан уйһыулыҡҡа табан йүгерә.* Ф. Рәхимғолова.

**УЙЫЛТЫУ** *к.* Уйым, соҡор итеп емереү. *Ер уйылтып атлап килгәндә, ир уртаһы — илле тигәндә, баҫыуҙарҙы байҡап ҡайтҡанда .. һуштан яҙҙы гәйәр ҡарт һалдат.* С. Кулибай.

**УЙЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **уйыу.** *Боҙ уйылған. Мәке уйылған. Өй бураһына тәҙрә уйылған.*

**2.** Соҡор рәүешенә килеү; соҡорланыу. *Ғәйфи баҫҡан ерҙәр ни өсөндөр төшөп китте ҡапыл уйылып.* З. Биишева. *Бәҙиғолдоң түңәрәк кенә итеп уйылған, әскә батҡан күҙҙәре мөлдөрәп кенә әллә ниҙәр өмөт итеп ҡарауына Айытбикә еңгәй ҙә сыҙап тора алманы.* Т. Хәйбуллин.

**3.** Ниҙәндер эҙ ҡалыу, ярылыу, йәрәхәт барлыҡҡа килеү. *Урман алмалары йыйып, ауыҙым уйылғансы шуларҙы ашаным.* Б. Ишемғол. *Урта бармағым уйылды алтын балдаҡ кейгәнгә* (Халыҡ йырынан).

♦ **Уйлап ҡараһаң, уйылып китерлек** бик ауыр, яман хәлгә ҡарата әйтелә.

**УЙЫМ** *и.* **1.** Тәҙрә, ишек һ. б. өсөн уйылған урын. *Тәҙрә уйымы.* ■ *Илшат .. ишек уйымы аша кире урамға ырғыны.* А. Ғирфанов.

**2.** Күлдәктә, аяҡ кейемендә һ. б. махсус өлгө буйынса ҡырҡып, уйып алынғын урын. *Ең төбө уйымы.*

**УЙЫМ-УЙЫМ** *с.* Бүленеп-бүленеп торған айырым-айырым, тош-тош. *Ашлыҡтың уйым-уйым ере, йомран ашапмы, сей ҡалыпмы, үҫмәгән.* Һ. Дәүләтшина.

**УЙЫН** [1] *и.* **1.** Ҡыуаныс, йыуаныс бирә торған балалар шөғөлө. *Йәшенмәк уйыны. Ҡурсаҡ уйыны. Сүрәкә уйыны. Соҡор туп уйыны. Балалар уйыны.* ■ *Ишек алдында бер нисә бала .. шаярып, тауышланып йөрөй, ағас мылтыҡ менән һуғыш уйыны уйнай.* Д. Юлтый. **Ҡыҙҙар уйыны** 1) ҡыҙ балалар ғына ҡатнаша торған уйын; 2) элек йәш ҡыҙҙарҙың яҙ көнө тауға, ҡырға сығып ойоштороған уйыны. **Уйын башы** уйынды алып барыусы.

**2.** Спорт йәки башҡа шуның кеүек нәмә шөғөлө. *Волейбол уйыны. Гимнастика уйыны.*

**3.** Ғәскәрҙең хәрби күнекмә өсөн башҡарылған шөғөлө. *1917 йылдың мартында .. мине һалдатҡа алдылар. Ырымбурҙа һалдат уйыны өйрәттеләр.* Т. Йәнәби. *Ҡыҙыл гәскәр теҙелеп, йырлап ҡайта уйындан* (Халыҡ йырынан).

**4.** Ҡауышҡан осорҙағы ата ҡоштоң инә ҡошто әүрәтеү өсөн яһаған төрлө ҡыланышы. *Күгәрсен уйыны.* ■ *Заповедникта яҙ була. Һуйыр, ҡор уйындары башлана.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 11 март.

**5.** *күсм.* Ҡыҙыҡ өсөн эшләгән бер шөғөл. / Мәрәкәгә, шаярыуға ҡоролған мөғәмәлә йәки башҡа нәмә. *Уйынға һабыштырыу.* ■ *Ҡараҡолөмбәт] биш йыл буйы хаҡымды һис бирмәне. Минең ишене рәнйетеү — уға уйын.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**6.** Йырлау, бейеү, күңел асыу өсөн үткәрелгән йыйын. *Уйын йыйыу. Уйынға сығыу.* ■ *Йәмле тугай буйында ошо һырға түйын уйнап-көлөп үткәрергә килгәнбеҙ уйынға.* М. Буранғолов. / Сәхнә тамашаһы. *Уйын ҡуйыу. Уйын ҡарау.*

**7.** Көй башҡарылышы. *Уйын ҡоралы.*

◆ **Уйын ҡумыҙ** *диал.* сығанаҡ бармаҡтың бармаҡ һанап уйнағанда әйтелә торған исеме; сөлдөр сөмәк.

● *Уйындан уймаҡ сыға.* Мәҡәл.

**УЙЫН** [2] *и.* Кәрт уйнағанда иң ҙур һаналып, башҡа төрҙәге теләһә ниндәй кәртте баҫа, яба ала торған кәрт төрө. *Уйын менән баҫыу.* // *Уйын валет. Уйын туз.*

**УЙЫНДЫ** *и. ҡар.* **уйҙыҡ.**

**УЙЫН-КӨЛКӨ** *и. йыйын.* Кәйеф асыу өсөн эшләнгән төрлө ҡыҙыҡ. *Бәхәстең аҙағы тағы ла уйын-көлкөгә әйләнә. Таминко тағы үҙенең көлкөләре менән бөтә һалдаттарҙы шаулата башлай.* Д. Юлтый. *Дейеү ҡыҙҙары йыр, бейеү, уйын-көлкө менән Түҙемголдоң күңелен асырға тырышҡан* (Әкиәттән).

**УЙЫНҠЫ** *с.* Уйылып, соҡорланып торған. *Ике яғы уйынҡы линза.* ■ *[Хәмәт — Рауилға:] Ҡомташтың уйынҡы урынына һин йоҡа аҡташ ҡыҫтырып ебәр. Иретмә менән генә тултыра алмаҫһың.* Ә. Вәли.

**УЙЫНЛЫ** *с.* Уйнап, шаярып эшләнгән; уйнап әйтелгән. *Уйынлы һүҙ.*

**УЙЫНЛЫ-ЫСЫНЛЫ** *с.* Ярым шаяртыулы. *Айбулат Ҡотлоярҙың уйынлы-ысынлы һүҙҙәренә ни тип тә мәғәнә бирә алманы.* Һ. Дәүләтшина. *Ул [ҡыҙ] еңел, уйынсаҡ аҙым менән ятҡан лы бер-берен коҙа тип йөрөй. Хатта Зөлхизәнең ҡолағын Аҙнағолға тешләтеп тә ҡуйғандар.* З. Биишева.

**УЙЫНСА** *и. диал. ҡар.* **уйын** [1] 5. *Сакай .. эш тураһында һөйләмәй, һүҙҙе уйынсаға бороп ултырыуында булды.* Б. Бикбай.

**УЙЫНСАҠ** *с.* Уйнау, көлөүҙе яратыусан; уйынсыл, шаян. *Уйынсаҡ тәбиғәтле. Уйынсаҡ булыу.* ■ *[Сәбилә] асыҡ, уйынсаҡ бисә. Һүҙгә һүҙ, көлкөгә көлкө табып тора.* Д. Юлтый. *Ҡара, беҙҙең ҡашҡа быҙау, ҡара, ҡандай уйынсаҡ! Һикерә йөрөп уйнар ине, уңайһыҙлай муйынсаҡ.* Ғ. Амантай. / Шаянлыҡ, шатлыҡ сағылған, шаянлыҡ ҡатыш; уйынсыл. *Уйынсаҡ һүҙле.* ■ *Әбей үҙе иламаны. Тик баяғы уйынсаҡ йылтыр күҙҙәрен тәрән уй баҫты.* Һ. Дәүләтшина. *Ул [ҡыҙ еңел, уйынсаҡ аҙым менән ятҡан еремә килде.* С. Агиш.

**УЙЫНСАЛАУ** *к.* Уйынға, көлкөгә һалыу; шаяртыу. *Уйынсалап һөйләү. Уйынсалап көлөү.* ■ *Ғариф ағайҙың өй башында тимер-томор тултырылған бер йәшниге бар. Ҡарт уйынсалап, уны «хазина йәшниге» тип йөрөтә.* Б. Бикбай.

**УЙЫНСЫ** *и.* Уйынға ҡатнашҡан, уйын уйнаған кеше. *Уйна, гармун! Уйна, тыйылма! Беҙ бит бында хеҙмәт туйында. Уйынсылар уйнап, бейеп, көлөп, ял итһендәр һинең ҡуйынында.* Ғ. Амантай. / Уйын, йыр оҫтаһы, уйын, йырға әүәҫ кеше. *[Ғәлиә — Булатҡа:] Мин һине уйынсы, шиғырсы тип йөрөһәм, һин .. ҡатып тик тораһың.* К. Кинйәбулатова.

**УЙЫНСЫҠ** *и.* **1.** Балалар уйната торған нәмә. *Уйынсыҡ менән уйнау.* // *Уйынсыҡ балыҡ. Уйынсыҡ машина. Уйынсыҡ туп.* ■ *Уларҙа [йәш һалдаттарҙа] һаман балалыҡ, төрлө уйынсыҡ менән мауығыусылыҡ бар.* Д. Юлтый. *Уйынсыҡ поездар китте вагондар тағып.* К. Кинйәбулатова. / Күңел астыра, ҡыҙыҡ таптыра торған нәмә. *Ҡыҙҙар юлда тыуҙы. Сәңгелдәктәре өй өрлөгөндә түгел, ҡайын ботағында бәүелде. Ағас ботағында һайраған ҡоштар уларға уйынсыҡ булды.* Р. Низамов.

**2.** *күсм.* Кеше ихтыярынан сыға алмаған, кеше иркендәге кеше; ҡурсаҡ. *Исхаҡ — ул аңһыҙлығы арҡаһында дошман ҡулында уйынсыҡҡа әйләнеп барған бер тип.* Ғ. Хөсәйенов.

**УЙЫНСЫЛ** *с.* Уйын-көлкөнө яратыусан; уйынсаҡ. *Уйынсыл кеше.* / Шаянлыҡ менән һуғарылған, шаянлыҡ ҡатыш; уйынсаҡ. *Кәшфулла ла ҡатынының уйынсыл һүҙенә эйәреп, йылмайып ҡына: — Әйтһәң, белермен,— тине.* Ш. Насыров.

**УЙЫНҺЫҘ** *с.* Шаяртыу булмаған; етди. *Айбулат бөтөнләй уйынһыҙ төҫ менән уйланып: «Запас, мин юҡҡа киленең бәпесләп ҡуйһа, кендек инәһе бул инде, йәме»,— тип үтенде.* Һ. Дәүләтшина.

**УЙЫУ** *к.* **1.** Уратып ҡырҡып, тишек яһау. *Ишек урыны уйыу. Мәке уйыу.* ■ *Шунда уҡ лом, балта, көрәктәр йүгертеп килтереп, эшкә башланылар. Боҙ уйыу оҙаҡҡа һуҙылманы.* Б. Бикбай. *Егет балта алып, өйҙөң ҡояш төшә торған яғына тәҙрә уйған, ти* (Әкиәттән). / Йоҡараҡ бер нәмәнең ситен ҙур итеп киртеү. *Малдың ҡолағын уйып, иң һалыу.*

**2.** Соҡор рәүешенә килтереү, соҡор итеү. *Ергә уя баҫып атлау.* ■ *Сталинград... Волганың бомбалар уйған яр ите.* Ш. Янбаев. *Күҙәйҙең йөрәген ярып үтә торған Ҡариҙел, уның матур тугайҙары, шул тугайҙарҙы уйып-уйып ултырған күлдәре тағы ла йәйге кейемгә кейенгән.* И. Насыри.

**3.** Ни менәндер эҙ ҡалдырыу, соҡоу, ярыу. *Мәрмәргә уйып яҙылған Зояның һуңғы һүҙҙәре.* Р. Ғарипов. *Ул [Зирәк] бысаҡ менән ҡулын уя.* Ш. Биҡкол.

**4.** Кейем теккәндә яға, ең һ. б. уйымы яһау. *Ең төбө уйыу. Кеҫә урыны уйыу.* ■ *Аҡлы ситса күлдәгеңдең яғаларын ҙур уйма* (Халыҡ йырынан).

**УКА́З** [*рус.*] *и.* **1.** Юғары властың закон көсөндәге ҡарары; ҡарар. *[Ҡолморҙа старшина:] Был указ буйынса беҙгә ошо өс көн эсендә Сыуашбайға күсеп барырға ла байҙың алтын диләнкәһен бушатырға кәрәк.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Диниә назаратының муллалыҡҡа хоҡуҡ бирә торған танытмаһы. *[Моратша бай], мөфтигә яҙып мулланың указын һалдырып алам, тип, бармаҡ янап ҡайтып китте.* Һ. Дәүләтшина.

**УКАЗЛЫ** *с.* Диниә назараты тарафынан раҫланған указы булған. *Указлы мулла.*

**УКЛАД** [*рус.*] *и. эк.* Нигеҙендә етештереү сараларына һәм уға ярашлы етештереү мөнәсәбәттәренә милектең билдәле формаһы ятҡан хужалыҡтың махсус тибы. *Патриархаль уклад. Социалистик уклад.*

**УКО́Л** [*рус.*] *и.* Тирә аҫтына, венаға һ. б. шприц менән ебәрелә торған дарыу; иньекция. *Укол ҡаҙау. Укол һалыу.*

**УКРАИН** *и.* Украинаның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (славян телдәренең береһендә һөйләшә). *Украин халҡы. Украин ҡатыны. Украин теле.*

**УКРАИНСА** *р.* **1.** Украин телендә. *Украинса аңлау.*

**2.** Украиндарға хас, украиндар кеүек. *Украинса кейенеү.*

**УКРО́П** [*рус.*] *и.* Тетмәкәй япраҡлы, һары сатыр сәскәле баҡса үләне (япрағы ашты тәмләү өсөн ҡулланыла). *Укроп еҫе. Укроп орлоғо.*

**У́КСУС** [*рус.*] *и. кар.* **һеркә** [1] 1.

**УҠ** [1] *и.* **1.** Ян менән ата торған төҙ нәҙек таяҡ. *Алмас башаҡлы уҡ. Мөгөҙ башаҡлы уҡ. Уҡ башағы. Уҡ йөнө. Уҡ киҙәһе. Уҡ атыу. Уҡ юныу. Яу уғы.* ■ *Алпамыша килеп уҡ, янды ала ла ағасҡа күҙәп атып ебәрә. Уғы ағасты яра тишеп үтә.* «Алпамыша». *Салауат батыр ир ине, менгән аты кир ине. Яурынына уҡ тейһә, себен тешләй тип ине* (Халыҡ йырынан). **Ҡалаҡ** (*йәки* **ҡырма**) **баш уҡ** ялпаҡ башаҡлы ҡырҡҡыс уҡ. *Ҡараҡәләмбәт .. ҡалаҡ баш уҡ менән Бабсаҡтың билен өҙә ата.* «Бабсаҡ менән Күсәк». **Сыраҡ баш уҡ** башағы биш асалы уҡ. **Тупай баш уҡ** йомортҡа ҙурлыҡ баш ҡалдырып, ҡайындың төбөнән яһаған уҡ (тимер кейемле кешенең, сикәһенә атҡандар). / *кусм.* Ныҡ тәйҫирле, үткер нәмәнең сағыштырыу билдәһе. *Йәшен уғы.* ■ *Йәнтимергә әйткән һүҙҙәремдең һәр өнө уҡ ине.* С. Агиш. *Ҡашың — йәйә, керпегең — уҡ, Өммихая. Йөрәгемә уғың керҙе, мине ая.* Ш. Бабич.

**2.** Пуля. *Туп йәҙрәләре килеп шартлай, меңәрләгән мылтыҡтан атылған уҡ ямғыры яуа.* А. Таһиров.

**3.** Тирмәнең көмбәҙендәге нәҙек таяҡтарҙың береһе.

**4.** Күтәргес крандың әйләнеп торған оҙон өлөшө, шулай уҡ ауыр нәмәләрҙе күтәреү өсөн махсус яйланма. *Крандың оҙон уғы иҙмәне ташсылар янына килтерер ҡуйҙы.* «Совет Башҡортостаны", 1965, 13 февраль.

**5.** *диал. кар.* **уҡлау** 2.

**6.** *диал. кар.* **ҡаяу** [2] 1.

◆ **Йөнһеҙ уҡ** йүнәлешһеҙ, үҙ фекерһеҙ кешегә ҡарата. **Уҡ баш** башын ғына ҡороп яһаған кирәгәһеҙ тирмә. *Ҡуҙый Курпәс уҡ баштың тәбер бауына атын бәйләп, уҡ башҡа керҙе, бер аҙ тамаҡ ялғанылар.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». **Уҡ булып ҡаҙалыу** бик ныҡ тәьҫир итеү. *Карташовтың был һүҙе беҙгә уҡ булып ҡаҙалды.* Д. Юлтый. **Уҡ йылан** *диал.* тос йылан (*кар.* **йылан**). **Уҡ һалмыш** уҡ атыш уйыны (тәүҙә сәпкә аталар; тейҙерә алмаған берәү өҫкә ата, ҡалғандары һауалағы шул уҡҡа ата; ергә төшкәс, был уҡты сәнсеп ҡуялар, шунан һәр кем үҙ уғы төшкән ерҙән ҡырҡҡыс менән уға тағы ата).

**УҠ** [2] (**үк**) *киҫ.* **1.** Күрһәтеү алмаштары һәм «һымаҡ», «кеүек», бәйләүестәре менән килеп, тиңләштергәндә, берләштергәндә ҡулланыла. *Ошо уҡ.* ■ *Шул уҡ йылда тәбиғәтте маҡтап бер-ике шиғыр ҙа яҙҙым.* Т. Йәнәби. *Шундай уҡ ян-яҡта йыйындар булып июнь үтер.* Ш. Бабич.

**2.** Эш-хәрәкәттең ваҡытын, урынын билдәләп, баҫым яһай. *Алдан уҡ. Бала саҡта уҡ. Таңдан уҡ.* ■ *Төлкө кешенең еҫен әллә ҡайҙан уҡ һиҙеп килә.* М. Тажи. *Уның [байҙың] артынса уҡ теге эт тә һикереп тора* (Әкиәттән). / Эш-хәрәкәткә айырым баҫым менән төҫҡай. *Гариф ҡарт уның [Тимерҙең] ингән күҙ ҡарашынан уҡ һиҙҙе.* Б. Бикбай. *Һыбайлылар арбаны уратып уҡ алды.* Ә. Чаныш.

**3.** Алдындағы һүҙҙең мәғәнәһен йомшартып килә. *Шаҡтай уҡ. Яҡшы уҡ.* ■ *Намаҙ уҡ түгел, бәләкәй генә бер дини йыйылыш.* С. Агиш. *Пароход әле килгәнсе тип, беҙ һөйләшеп йөрөнөк оҙаҡ уҡ.* Ғ. Сәләм.

**4.** Башҡорт халыҡ йырҙарында һүҙҙе көсәйтеү, көйҙө килештереү өсөн ҡулланыла. *Ҡайтып уҡ ятыр өсөн йортом юҡ, яурын киреп атыр уғым юҡ* (Халыҡ йырынан).

◆ **Шулай уҡ** *кар.* **шулай** 3. **Шул уҡ ваҡытта** шуның менән бергә. *[Үмәр] үпкәләгән, кәмһетелгән, гәрләнгән, шул уҡ ваҡытта үҙен ҙур күрһәтергә тырышҡан атай кеше тауышы менән улына ташланды.* Һ. Дәүләтшина. **Шунда уҡ** шул мәл эсендә. *Кейеҙбай .. ҡылдың береһен өтә, шунда уҡ ҡола толпар килеп баҫа* (Әкиәттән).

**УКА** *и.* **1.** Ҡайыу, сигеү һ. б. өсөн алтын, көмөш йәки бүтән йылтыр ҡушып эшләнгән еп. *[Ят кешенең] башында һәр мөйөшө тигеҙ бөгөлгән ука менән сигелгән үзбәк таҡыяһы.* С. Агиш. *Елкаһың ботаҡтарына тартмалар, йондоҙҙар, ҡушҡалар, ука, ҡағыҙ таҫмалар элеп ҡуя башланыҡ.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Шул ептән һуғылған биҙәкле таҫма, туҡыма. *Аҡ ука. Алтын ука. Сын ука. Тешле ука. Ука баҫыу.* // *Ука сук.* ■ *Урам буйлап берәү килә, көмөш ука бәйләп биленә* (Халыҡ йырынан).

**УКАЛАУ** *ҡ.* **1.** Ука ҡушып сигеү, үреү. *Ҡыҫас матур ялдарыңды укаларбыҙ, юрғам* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ука баҫыу. *Еләндең итәк-еңен укалау.*

**УКАЛСА** [*рус.* околица] *и. диал.* Баҫыу ҡәртәһе.

**УКАЛЫ** *с.* Ука менән биҙәлгән, ука баҫылған. *Укалы елән. Укалыең.* ■ *Укалы камзул кейгән ҡатындар .. бейә һауып йөрөй.* М. Ғафури.

**УКБАЛЫҠ** *и. кар.* **сөгә.**

**УКБАШ** *и.* Бикре һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған оҙон осло моронло, һырт ҡабырға буйы ҡабырсаҡлы Каспий һәм Ҡара диңгеҙ балығы (ыуылдырыҡ сәсергә йылғаға инә).

**УҠЛАУ** [1] *и.* **1.** Ҡамыр йәйә торған йомро таяҡ.

**2.** (*йәки* **һабан уҡлауы**) һабандың төрәнен алтәкмәгенә тоташтырған үҙәк тимер.

◆ **Уҡлау йоттоңмо әллә?** төп-төҙ булып ҡатып ҡалған кешегә ҡарата әйтелә. *[Йәмги — Фәрхиәгә:] Эй, һин, ҡара әле! Ниңә ҡаттың, уҡлау йоттоңмо әллә?* Х. Ғиләжев.

**УҠЛАУ** [2] *ҡ. диал. кар.* **тоҡҡау** 1. *Уҡ уҡлау. Таяҡты уҡлау.*

**УҠЛЫ** *с. диал.* Буйтлы. *Уҡлы балта. Уҡлы таяҡ.*

**УҠМАРЫЛДЫРЫУ** *ҡ. диал.* Уҡмаштырыу.

**УКМАРЫЛЫУ** *к. диал. кар.* **укмашыу** 1. *Укмарылып тороу.*

**УКМАШ** *с.* Киҫәк-киҫәк йәбешеп, бергә ойошкан. *Укмаш кар. Укмаш тупрак. Укмаш булыу. Укмаш итеү. // Аккола .. өҫтөнә һырышкан епшек кар укмаштарын кагынды.* Б. Бикбай.

**УКМАШТЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **укмаштырыу.** *Шундай ауыр, шундай куркынысла минуттарҙа һәр аҙым, һәр һулыш һаналган секундарҙа сәнскеле сыбыктарҙан укмаштырылган өс-дүрт бот ауырлыктагы рогаткаларҙы күтәреп барырга кәрәк.* Д. Юлтый.

**УКМАШТЫРЫУ** *к.* **1.** Киҫәк-киҫәген бергә нык итеп йәбештереү. *Балсыкты укмаштырыу.* ■ *Иртәнсәк күк йөҙөнә тагы кояш сыга. Гүйә төнгө йондоҙҙарҙы берәү кулы менән алган да укмаштырып, ҙур бер шар яһап куйган тиәрһең.* К. Мәргән.

**2.** Бергә аралаштырып, нык беректереү; ойоштороу (сәсте, йөндө). *Йөндө укмаштырыу.*

**3.** *кусм.* Бергә йыйыу; туплау. *Карт айырым өҙөктәрҙән торган иҫтәлектәрен укмаштыр[а].* Ә. Чаныш. *Айгыр өйөрҙө таркатмай, бер генә ергә укмаштыра ла ышыгырак ергә алып китә.* М. Ғөбәйҙуллин.

**УКМАШЫУ** *к.* **1.** Киҫәк-киҫәк булып, бергә йәбешеү, бергә ойошоу. *Йәш агастарҙың иң кыйы ерендә яныл укмашкан ниндәйҙер металл киҫәктәре табылды.* Ф. Локманов. *Болоттар таралырга теләмәй тагы укмаша.* З. Әхмәтов. / Киҫәк-киҫәк булып нимәгәлер йәбешеү. *[Карт] арба тәгәрмәстәренә укмашкан быскракты кыргылап төшөрҙө.* М. Тажи. *Камилдың .. кукрәгенә кан укмашкан.* Р. Ниғмәтн.

**2.** Бергә аралашып, нык берегеү; ойошоу (сәскә, йөнгә карата). *«Насип, ни эшләп шулай оҙакланың?" — тине Шәһиҙә уның бүрек кейеп йөрөп, укмашкан сәсен бармактары менән тарап.* И. Абдуллин.

**3.** *кусм.* Бергә йыйылыу; тупланыу. *Укмашып йәшәү. Укмашып ултырыу.* ■ *Ун бишләп һыбайлы таралышмай, бергә укмашып, яй гына килә.* Ф. Иҫәнғолов.

**УКРА** *и.* **1.** (*йәки* **укра себене**) Һыйыр малының арка тиреһе аҫтына йомортка һала торған себен. *Башмак үгеҙҙәр, украның тешләүенә түҙә алмай сәбәлән[ә].* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Шул йомортканан яралып, малдың тиреһе аҫтында ҙурайып яткан ак корт. *Бер башмак украһына сыҙай алмай безләп, койрок сәнсеп, башы һуккан якка сапты.* Ф. Иҫәнғолов.

**УКРАН: укран бал** *диал.* һитә, манса.

**УКРАНЫУ** *к.* Өндәшкән, сакырған кеүек, йомшак кына итеп тауыш биреү (йылкы малына карата). *Йүгән тауышын ишетеп, яу аттары укранды.* М. Буранғолов. *Күк айгыр, элекке хужаһының тауышын таныган кеүек, украныл .. куйҙы.* З. Биишева.

**УКРАНЫШЫУ** *к. урт. кар.* **украныу.**

**УКРАУ** *к. диал.* Украныу. *Айырылганда атым украй-украй, тыпырсынып ерҙе сапсыны.* Б. Вәлит.

**УКСЫ** *и.* **1.** Ук атыусы. *Мәргән уксы.* ■ *Бер генә уксы ла кошка атып тейҙерә алмаган* (Әкиәттән).

**2.** Йәйәүле ғәскәрҙә хеҙмәт иткән һалдат. *Патронташын бәйләп, маска кейеп, мылтык тоткан батыр уксылар.* Ғ. Амантай. // *[Мораҙым:] Мин уксы бригадала хеҙмәт иттем. Пехотала. Автоматчик булдым.* Ғ. Әмири.

**3.** (*баш хәреф менән*) *астр.* Зодиактың береһе (Һыукояр менән Арыҫлан йондоҙлоктары уртаһында урынлашкан).

● *Ике карга талашһа, уксыга — йөн.* Мәкәл.

**УКСЫЛ** *с. диал.* Осло. *Уксыл һәнәк.*

**УКСЫН** *и. диал.* Оҫкон.

**УКТА** *и. диал.* Һукта.

**УКТАЙЫУ** *к. диал. кар.* **бокайыу** 1.

**УКТАЛЫУ** *к.* **1.** Ниҙер эшләргә, әйтергә йыйынып, ынтылыш яһау. *Тагы бер һорап карайым, тип уйлап, Тулыбай укталып та куйҙы. Булдыра алмай сыгып китте.* Ғ. Дәүләтшин. *Яткан ерҙән башын калкытып, ул егет тормак булып кат-кат укталды.* А. Игебаев.

**2.** Ярһып, нимәгәлер карай ынтылыу; ташланыу, атлыгыу. *Ат менерҙәй барыһы .. дошман яуына каршы күкрәк киреп укталган.* М. Буранғолов. / Юғарыға ынтылыу, атлығыу. *Капыл бөркөт куккә укталды, йәшендәр юк булды.* Х. Ғиләжев.

**УКТАН-СУКТАН: уктан-суктан кейенеү** матур итеп өр-яңынан кейенеү. *[Айытбай — Алтынбикә тураһында:] Мәгәр донъяһын тота... Балалары ла уктан-суктан кейенеп, тап-таҙа йөрөй.* Ф. Иҫәнғолов.

**УКТА-ҺУКТА** *р. диал.* Һирәк-һаяк. *Урамтын, тик беҙҙең командирҙың укта-һукта: «һайт-два-три!.. һайт-два-три!» — тип куйган тауышы гына тынлыкты боҙа* И. Насыри.

**УК-ҺАҘАК** *и. йыйн.* **1.** Яу һәм һунар уктары. *Ялтырап та утә, аткан сакта, ук-һаҙактың башак коросо* (Халык йырынан).

**2.** Уктан, яндан торған бөтә корал. *Ук-һаҙагын алып, кылыс тагып, ир Салауат сапкан яуҙарга.* К. Даян.

**УК-ҺАЯ** *и. йыйн. кар.* **ук-һаҙак.**

**УКШЫТЫУ** *к. эйһ. ф. кар.* **укшыу.** *Ауыҙга капкас, аштан йүкә, тимер тәме килә... Бер-ике калак капһаң, укшыта башлай.* Д. Юлтый.

**УКШЫУ** *к.* Коҫорға укталыу. *Ни өсөн күңеле болганганын уҙе генә аңлаган Сәриә яуап кайтарманы. Укшыны. Ашаганын актарып-актарып коҫто.* Я. Хамматов.

**УКЪЯПРАК** *и.* Яр буйында, һаҙмат урында үҫә торған нәҙек оҙон япраклы, ак сәскәле үлән.

**УКЫЛДАУ** *к. кар.* **уңкылдау.**

**УКЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **укыу** 1, 3, 4. *Укылган китап. Лекция укылды. Рәхмәт укылды.*

**УКЫЛЫШЛЫ** *к. кар.* **укымлы.**

**УКЫЛЫШҺЫҘ** *с.* Укыуға насар. *Укылышһыҙ әҫәр.*

**УКЫМЛЫ** *с.* Укыуға һәйбәт. *Укымлы китап.*

**УКЫМЫШ** *и.* Укып алған белем. *[Гөлбикә:] Укымышым булмагас, оҫта итеп әйтә белмәйем.* Р. Ниғмәти.

**УКЫМЫШЛЫ** *с.* Белемгә эйә, укымышы бар *Нурлы кейәү .. бик укымышлы, иҫке китаптарҙы үлеп яраткан бер кеше ине.* Ә. Вахитов.

**УКЫНСЫ** *и. диал.* Тире иләүсе.

**УКЫНЫУ** *к.* Ауыҙ эсенән доға, намаҙ уҡыу. *Ҡурҡышҡан кешеләр мәсеттән уҡына-уҡына сығып, төрлөһө төрлө яҡҡа тарала* (Әкиәттән).

**УКЫТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **уҡытыу** 1, 2, 4.

**УКЫТЫУ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **уҡыу.** *Хатты кешенән уҡытыу. Ҡөрьән уҡытыу. Никах уҡытыу.* ■ *Мин уҡыйым әле? — Апай, минән уҡытып ҡара әле!* М. Тажи.

**2.** Уҡырға биреү, уҡырға ихтыяр итеү. *Шиғырҙы ул [Дилә] инде үҙе генә уҡып ятлау түгел, иптәш ҡыҙҙарына ла уҡытты.* һ. Дәүләтшина. *Хәсәд күҙгә был хатымды уҡытмағыл, иғтибарһыҙ ергә ҡуйып, юғалтмағыл* (Бәйеттән).

**3.** Белемгә өйрәтеү. *Уҡытыу тәжрибәһе. Уҡытыу ысулдары. Уҡытыу эше.* ■ *Шәүәлиҙе русса уҡытып өсөн [атаһы] ҡайҙандыр Данила тигән бөкөс карт килтертә.* Б. Бикбай. *[Оркоя:] Пединститутты тамамлағас та районда өс йыл буйы балалар уҡыттым.* Н. Иҙелбай. / Белем биреү, кемгәлер уҡырға мөмкинлек тыуҙырыу. *Зәйнәп, уйлап ҡара, дәүләт һине ниңә уҡытты?* Ғ. Сәләм. *Фаш ҡылынғас, беҙ икәүҙе уҡытманы хәҙрәт* (Бәйеттән).

**4.** Билдәле бер фәндән йәки фән буйынса дәрес алып барыу. *Тарих уҡытыу.* ■ *Химиянан уҡыта ине бит Вәлишин НСШ-та, төпкөл ауылда.* Ғ. Сәләм.

**5.** Педагогик эшмәкәрлек менән шөғөлләнеү, уҡытыусы булыу. *Институтта уҡытыу. Мәктәптә уҡытыу.* ■ *Яҙ көнө мин тағы ла өйрәнгән ҡаҙаҡ араһына уҡытырға барҙым.* Т. Йәнәби. *[Хәйҙәр — Сәғиҙәгә:] Уҡып бөткәс, мин дә һинең янына барырмын, икәү бергә уҡытырбыҙ.* М. Тажи.

**6.** *кусм.* Ҡаты сара менән киҫәтеү; аҡылға ултыртыу. *[Мөлөк — Степанга:] Өндәшмәгән һайын ҡоторҙоң да киттең. Уҡытырмын мин һине, иманһыҙ!* Т. Хәйбуллин.

♦ **Арт һабағын (*йәки* иманын) уҡытыу** *кар.* **һабаҡ** [2].

**УКЫТЫУСЫ** *и.* Уҡытыу эше менән шөғөлләнгән кеше. *География уҡытыусыһы. Тарих уҡытыусыһы. Институт уҡытыусыһы. Урта мәктәп уҡытыусыһы.* ■ *Уҡытыусы тәрән белемле, ихлас күңелле, тотанаҡлы булһа, уҡытҡан фәнен яратһа, аңлата белһә, балалар уны ярата.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1968, № 1.

**УКЫУ** [1] *к.* **1.** Яҙылғанды йәки хәрефтәр, башҡа яҙыу тамғалары менән баҫылғанды ҡысҡырып йәки үҙ алдыңа ҡабул итеү, танышыу. *Газета уҡыу. Хат уҡыу. Ишеттереп уҡыу. Шым уҡыу.* ■ *Уҡыр өсөн хикәйәләр, романдар, шиғырҙар, поэмалар булмағанлыҡтан, халыҡ фольклорҙы тыңларға һәм отоп алып һөйләп, йырлап йөрөргә яратҡан.* Ғ. Амантай. *Гөлйөҙөм ҡулындағы хатты уға [Диләгә] һуҙҙы: — Бына ағайыңдан хат бар, уҡып ишеттер..,— тине.* һ. Дәүләтшина. *Ташҡайҙарға сокоп, яҙҙым ҡарғыш, уландарым уҡыр бер сакта* (Халыҡ йырынан). / Яҙылған, баҫылған берәй нәмәне аңлай, ҡабул итә белеү. *Өс телдә уҡыу.* ■ *Мин .. төрки китаптарҙы ла арыу ғына уҡый белә инем.* Т. Йәнәби.— *Айбулат, русса уҡый беләһеңме? — тип һораны [Вася].* һ. Дәүләтшина.

**2.** *кусм.* Берәй төрлө тышҡы билдәләр буйынса кемдең дә булһа эске кисерешен, фекерен һ. б. белеү. *Уның күҙҙәренән ошо һүҙҙәрҙе уҡыным: «Туҡта әле, Салих, беҙ бөгөн булмаһа, иртәгә дуҫлашырбыҙ. Мин бит матур итеп ярата беләм».* С. Агиш. *Уҡып барам урман серҙәрен мин: төлкө үткән, ҡуян һикергән.* Б. Ноғманов.

**3.** Берәй тексты яттан, күңелдән әйтеү, һөйләү. *Доға уҡыу. Намаҙ уҡыу.* ■ *Ул [Индриль] ауыҙ эсенән генә көйләргә тотона йә ҡутәренке бер рух менән берәй шиғырҙы уҡый .. башлай.* Д. Юлтый. *Юлдыбикә әбей .. урындыҡ ситенә ултырып, иренен ҡыбырлатып, бик оҙаҡ әллә ниҙәр уҡып, доға ҡылды.* Т. Хәйбуллин. / Тойғо менән оҙон итеп теләк, ҡарғыш һ. б. әйтеү. *Ләғнәт уҡыу. Өгөт-нәсихәт уҡыу.* ■ *Егет әбейгә рәхмәт уҡып, ул өйрәткән юл менән киткән* (Әкиәттән).

**4.** Тыңлаусыларға телдән ниндәй ҙә булһа мәғлүмәтте, ниҙең дә булһа эстәлеген һөйләү. *Доклад уҡыу. Лекция уҡыу.*

**5.** Белемгә өйрәнеү, берәй төрлө белем алыу, үҙләштереү. *Йөрөп уҡыу. Ситтән тороп уҡыу. Уҡырға барыу.* ■ *Байгужа йәш ваҡытында күп уҡый алманы, күберәк батраклыкта йөрөнө.* Д. Юлтый. *Дүртенсе кышка Стәрлебашка барып уҡырға тура килмәне. Ҡайҙа булһа ла ситкә китеп, яңыса уҡығы килде.* Т. Йәнәби.

**6.** Билдәле бер фәнде өйрәнеү. *Агрономлыкка уҡыу. Математика уҡыу.* ■ *[Захаров:] Һеҙ устав уҡығанһығыҙҙыр бит? Унда ни һөйләй?* Д. Юлтый.

**7.** Ниндәй ҙә булһа уҡыу йортоноң уҡысыһы булыу. *Институтта уҡыу. Мәктәптә уҡыу.* ■ *Әминев .. уҡытыусылар белемен арттырыу курсында ике йыл уҡыны.* Б. Бикбай.

♦ **Иманыңды уҡы** *кар.* **иман.**

● *Уҡығандың теле икәү.* Әйтем.

**УКЫУ** [2] *и.* **1.** Яҙылғанды йәки хәрефтәр, башҡа яҙыу тамғалары менән баҫылғанды таныу, ҡабул итеү өсөн булған күнекмә. *Уҡыу дәресе. Уҡыу китабы.* ■ *Мансурҙың яҙыуы тора-бара һәйбәтләнә төшһә лә уҡыуҙан һаман ауыр бара. Бөтә сәбәбе шул «р» өнөнә бәйләнгән.* М. Тажи.

**2.** Белем алыу буйынса ойошҡан рәүештә башҡарылған эш; һабаҡ. *Киске уҡыу. Яңы уҡыу йылы. Уҡыуға барыу. Уҡыуға инеү.* ■ *Сәйҙел уҡыуын бөтә, төҙөлөштәргә яңы белгес булып китер ул.* Ғ. Сәләм.

**3.** *күпл.* Айырым бер мәсьәләгә арналып, белгестәрҙең белемен күтәреү өсөн ойошторолған доклад йәки лекциялар циклы. *Педагогик уҡыуҙар. Пушкин уҡыуҙары.*

♦ **Уҡыу өйө** халыҡ араһында ағартыу эше алып бара торған өй. **Уҡыу йорто** *кар.* **йорт.**

**УКЫУСЫ** *и.* **1.** Башланғыс йәки урта уҡыу йортонда уҡыған бала. *Мәктәп уҡыусыһы. Тимер юл училищеһы уҡыусыһы.* ■ *[Фатима] уҡыуҙа ла яҡшы өлгәшә башланы. Уны .. иң алдынғы уҡыусыларҙан һанап, сигелгән күлдәк менән бүләкләнеләр.* Б. Бикбай. *Һәр мәктәптә уҡыусыларҙың белем сифатын күтәреү буйынса ныҡышмалы эш ойошторорға кәрәк.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1965, № 4.

**2.** Кемдән дә булһа берәй һөнәргә өйрәнгән, кайҙа ла булһа һөнәр оҫталығын үткән кеше. *Токарҙың укыусыһы.* ■ *Мин укыусы, мин — йырлаусы, мин — даһи. Уҙҙырырмын мин даһиҙан, билләһи!* Ш. Бабич.

**3.** Китап, газета укыған кеше (яҙыусыға карата). *Һинең вакытыңды алған өсөн мин гәйепле, иптәш укыусым. Ә кем еңде бөгөн? Был турала киләһе бүлектә укы һин.* Ғ. Сәләм.

**4.** Китапханаға йөрөп укыған кеше. *Укыусылар конференцияһы.*

**УКЫУ-УКЫТЫУ** *и.* Мәктәп һәм башка укыу йорттарында белем биреү эшен тәьмин иткән бөтә сара. *Укыу-укытыу эше. Укыу-укытыу бүлеге мөдире.* ■ *[Рәхимйән — Оркояға:] Гел тәрбиә, укыу-укытыу хакында ғына һөйләйһегеҙ. Әллә һеҙ укытыусымы?* Н. Иҙелбай.

**УЛ**[1] *и.* **1.** Ир бала (ата-әсәһенә карата). *Кинйә ул. Уртансы ул. Оло ул. Үгәй ул.* ■ *Квартира хужаһы бер пенсионерка, беҙҙең йәштәрҙәге бер кыҙы унан кесерәк бер улы бар.* С. Агиш. *Арба күҙгалыуға: «Атай, атай! Мин дә барам!» — тип ташланды [Сурағолдоң] бәләкәй улы Хәйҙәр.* Т. Хәйбуллин. / Үҙ балаңдың ир балаһы. *Улдың улы. Кыҙҙың улы.* / *эйл. ф.* Ир балаға йәки йәш ир-атка өндәшеү һүҙе.— *Мә, улым, һиңә улым Аскарҙан бер комарткы булһын,— тине [Айбулатка Шәһиҙә әбей]* Һ. Дәүләтшина. *Баланың тәҙрә янынан китмәй, атаһын көтөп ултырыуына Сәгиҙә лә бошонды. «Атайың әллә Өфөгә китеп барҙымы икән, улым?» — тип баланың күңелен йыуатырға тырышты.* М. Тажи.

**2.** Билдәле бер катламдың ир затынан булған бер вәкиле. *Һөйә-һөйә косагыма алып меңәрләгән юкһыл улдарың, арымай-талмай йәштән өйрәтәмен ирек өсөн көрәш юлдарын!* Ғ. Амантай. *Ул ант итә һеҙҙең арағыҙҙа, эй, һеҙ калдык нәпман улдары!* С. Агиш.

**3.** Ил, халыктың ир затынан булған бер вәкиле. *Башкорт улы. Урал улдары.* ■ *Заманалар булған әлгәре, булған илдең батыр улдары.* Салауат Юлаев. *Һин хәҙер ватандың хөр улы, бынан һуң асык тот күҙеңде.* Ш. Бабич. / Билдәле бер эш, тормош өлкәһенең ысын вәкиле. *Хеҙмәт улы.* ■ *Йырла, бабай, йырла йәшһеҙ, артта бар бит көрәш улдары.* Ғ. Хәйри.

□ **Ул итеү** сит баланы үҙеңә алыу. *Үҙеңә йомак әйтәйем, тапһаң улым итәйем, тапмаһаң колом итәйем* (Кобайырҙан).

◆ **Инсан улы** *кар.* **инсан.**

● *Ата байлыгы улга йокмаҫ.* Әйтем.

**УЛ**[2] **(уның, уға, уны, унан, унда)** *зат а.* **1.** Быға тиклем йәки һуңынан булған хикәйәләүҙә исеме әйтелгән телмәр предметын күрһәтә. *Бер көндө Байгужа минән хат яҙҙыра. Ул һөйләй, мин яҙам.* Д. Юлтый. *Сынбулатов кыҙарынды, бүртенде. Уның Ямалга каршы һүҙ әйтер урыны калманы. Ул бынан тиҙерәк сығып китеү яғын караны.* М. Тажи.

**2.** Билдәле бер затка, булып үткән эш-хәлгә, урын-вакытка кире кайтарып тоҫкай.— *Күй инде, үткән яҙ булмаҫ яңынан. Ул сакта председатель Сакай Солтанов ине шул.* Б. Бикбай. *Бала булып ныгый икән унан ике йөрәктәге мөхәббәт һәм ул бала һинең йәшлек булып, ғүмереңде дауам итә икән.* Ғ. Сәләм.

**3.** *киҫ. функцияһында* һөйләмдәге бер һүҙҙе айырып йәки ниндәйҙер эш-хәлдең булмышын раҫлап, баҫым яһау өсөн кулланыла. *Тимер Янһаров ул — Кайынлы егете.* Б. Бикбай. *[Григорий:] Батшаның манифесы капкан ғына ул.* Һ. Дәүләтшина. *Башлап күйған сирек сәй әсмәһәң дә бөтә ул* (Халык йырынан).

**4.** *киҫ. функцияһында* Ниҙәндер төрлө яғына, төрлө сифат, рәүешенә баҫым яһап, теҙеп күрһәткәндә кулланыла. *[Юламан:] Һәй, килмәгән ере юк был сабыйҙың: ул буй, ул һып, ул һиҙгер, изге йөрәк.* З. Биишева. *Ғәләмәт шәп ине Сәлимгәрәй бабайҙың баксаһы. Ул емеш ағастары, ул еләктәр, ул еләктәр.* Ф. Рәхимғолова.

**5.** *киҫ. функцияһында* **икән, ине** ярҙамлык кылымдары менән белдерелгән теләк мәғәнәһен көсәйтә. *Тиҙерәк яҙ булһа икән ул. Кош һайрағанын ишетһәң ине ул.*

**УЛАЙ** *р.* **1.** Ул рәүешле. *[Наилә:] Ниңә улай тынып киттегеҙ, баягыса шаулап ултырығыҙ.* С. Агиш. *[Сәгиҙә:] Юк, юк, мин улай тип әйтә алмайым. Мин улай юкты бар итеп, алдап һөйләй белмәйем.* М. Тажи.

**2.** Ул якка. *Юлдар әле улай, әле былай уҙғанлыктан, уның [Гөлйөҙөмдөң] кайҙа боролғанын белеп булманы.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Ниҙелер иғтибарға алып, билдәләп куйған һымак иткәндә әйтелә.— *Улай, хәҙергә хуш булығыҙ! Хөрмәтегеҙгә рәхмәт!* Д. Юлтый.

◆ **Улай булғас** (*йәки* **булһа**) бер төрлө эш-хәлдән, шарттан сығып, ниндәйҙер фекергә килгәндә әйтелә. *[Әбей:] Улай булғас, мин һиңә бер хәйлә өйрәтәйем* (Әкиәттән). **Улайға китһә** бер нәмәгә, эш-хәлгә икенсе нәмәне каршы куйғанда әйтелә.— *Коммунисты кем тип уйлай улар, кеше түгел типме ни? Улайға китһә, улар үҙҙәре әҙәм түгел.* Һ. Дәүләтшина. **Улай ҙа** 1) шулай булһа ла, шунда ла. *Эште төшөнөп торам инде. Улай ҙа һорай күйҙым;* 2) ярар, әлдә. *Улай ҙа ярам еңел булды.* **Улай икән** кешенең һүҙенә йәки хәленә һығымта яһаған һымак иткәндә әйтелә. *[Йәнозак] Улай икән, кайтып киләм тиген, ә?* М. Тажи.

**УЛАЙ-БЫЛАЙ** *р.* **1.** Берәй төрлө. *[Әбей:] Был Сәгиҙә хакында һөйләй түгелме һуң?.. Кеше алдында улай-былай оятлы итеп ташламаһын.* М. Тажи.

**2.** Арлы-бирле. *Улай-былай иткәнсе байтак гәскәрҙе кырып та ташлағандар, ти* (Әкиәттән).

**УЛАЙТЫУ** *к. кыҫк. ф. һөйл.* Улай итеү. *[Шәрифулла — Заһитка:] Корҙаш, һине гелән «Шәрәй» тиҙәр. Ниңә улайталар икән? Миңә бер ереңдә окшамаған да баһа!* Я. Хамматов. *Куян сатанлап-сатанлап барып ултырҙы, ти. Бүтән януарҙар: «Нишләп улайтаһың?» — тип һорағас, куян: «Табанымды бер нәмә көйҙөрҙө»,— тигән,* (Әкиәттән).

**УЛАЙҺА** *инш. кыҫк. ф. һөйл.* Улай булһа. *Айбулат Мурзиндың .. һүҙҙәренән һуң капыл кабалана башланы.— Улайһа, беҙ эште һуҙмайык әле.* Һ. Дәүләтшина. *Йә, улайһа, бәгерем, хуш инде!* Ғ. Амантай.

**УЛАҠ** *и.* **1.** Һыу йәки башҡа шыйыҡлыҡ ағыҙыу өсөн соҡор итеп эшләнгән оҙон тар яйланма. *Яуған ямғырҙың һыуы улаҡтар буйлап .. түбән аға.* Ғ. Дәүләтшин. *Шахталарҙан һәм шурфтарҙан сыҡҡан ташлы ҡомдарҙы боҙло һыу аҡҡан .. ағас улаҡтарҙа йыуҙылар.* Я. Хамматов.

**2.** Күмәк малға һыу йәки ашарға һала торған оҙон ялғаш. *Ул [Моратов] ҡоҙоҡ эргәһендәге улаҡҡа бер-ике күнәк һалҡын һыу ҡойҙо ла атын эсерә башланы.* К. Мәргән. *Абзыҡайым аттарыңа ашарға һал улаҡҡа* (Бәйеттән).

**3.** *диал.* Ялғаш.

**УЛАН** *и.* **1.** Ир бала (ата-әсәһенә ҡарата). *Улан табыу.* ■ *Уландары Мансур менән Мәғәфүр ағаһына ярҙам итте.* Ж. Кейекбаев. *Әхмәҙулла бабай һиғеҙ бала үҫтерҙе. .. Ҡыҙҙары кейәүгә китте, уландарының күбеһе фронттан әйләнеп ҡайтманы.* Р. Низамов.

**2.** *эйл. ф.* Ир балаға йәки йәш ир-атҡа өндәшеү һүҙе. *[Аҡтүбә ҡарт:] Менеп тә генә китерҙәй буҙ ҡонан Буләр хандыҡы ул, уланым.* «Алпамыша».

♦ **Улан билгеһе** *диал.* тулғаҡ. **Улан яҫтығы** *диал.* һуңғылыҡ.

● *Теләнсе ишекте теләр, улан бишекте теләр.* Әйтем.

**УЛАН-УШАҠ** *и. йыйн.* Ир балалар.

**УЛАНЪЯҒАЛАЙ: уланъяғалай үлеү** баланан ҡотола алмай үлеү.

**УЛАР (уларҙың, уларға, уларҙы, уларҙан, уларҙа)** *зат. а.* Быға тиклем йәки һуңынан булған хикәйәләүҙә күплектә килгән исеме әйтелгән телмәр предметын күрһәтә. *Һөнәрсе ғәҙәттәгесә, янып, ярһып, көршәктәр яһай. Өйрәнсек уларҙы төрлө яҡҡа йөрөтөп һата.* З. Биишева. *Ата ҡаҙ ҙа, инә ҡаҙ ҙа, уларға ҡарап бәпкәләр ҙә һис кенә лә йылғаға төшмәй икән, ти* (Әкиәттән).

**УЛАУ** *к. диал.* Олоу.

**УЛ-БЫЛ** *и.* **1.** Берәй төрлө ярамаған, насар эш, көтөлмәгән хәл. *Ул-был була ҡалһа. Ул-был булмаһа ярар ине.* // *Ул-был нәмә. Ул-был хәбәр.* ■ *Бөгөн төн шуның менән үтте. Ҡурҡһаҡ та ул-был булманы.* Ш. Хоҙайбирҙин. *Врачтың ридикюлендә ул-былға йөрөтөлгән валидол бар икән, ауырыуға бер таблетка ҡаптыра һалды.* Б. Бикбай.

**2.** Асыҡ билдәле булмаған ҡайһы бер нәмә, эш-хәл. *[Күдрәш тураһында Фёдор:] Ә һуң был ышаныслы кешеме? [Ғайса:] Ул бөгөн генә килгән, уны-быны белмәй әле.* С. Мифтахов. *[Тимергәле менән Үмәр] оҙаҡ һөйләште. Уны-быны абайламаған Муйыл .. йоҡларға ятты.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Ул-был итеп** төрлөсә итеп. *Мулла ул-был итеп, өгөтләп ҡараһа ла һүҙен тыңлаған кеше булма[ны].* Һ. Дәүләтшина.

**УЛДЫМ-ТАЛДЫМ: улдым-талдым менән** ҡыйынлыҡ менән. *Айбулат менән Гөлйөҙөм улдым-талдым менән Ныязгол баяҙан сығып, ҡарлуғас ояһындай бәләкәс кенә балсыҡ өйҙәрендә үҙ алдына йылы донъя ҡорҙо.* Һ. Дәүләтшина.

**УЛТЫРАҠ**[1] *с.* Бер урында даими йәшәгән. *Ултыраҡ халыҡтар.* / Бер урында даими йәшәүгә ҡоролған. *Ултыраҡ тормош.* // *Ултыраҡ йәшәү.*

**УЛТЫРАҠ**[2] *и.* Өй йәки ауыл ултырған урын; урынлашҡан, йәшәгән урын. *Ауылдың өйләнмәгән йәш егеттәре, үткерерәк килендәре, .. йәш ҡыҙҙары .. Ғариф ултырағы артындағы яланға йыйылды.* Ғ. Хәйри.

**УЛТЫРАҠЛАНЫУ** *к.* Тороп, йәшәр өсөн урынлашыу. *Йылға буйында ултыраҡланыу. Ҡалала ултыраҡланыу.*

**УЛТЫРҒЫС** *и.* Бер кеше ултырмалы итеп, ғәҙәттә арҡаны терәп, һөйәлеп ултырыу өсөн арт ҡуйып эшләнгән күсереп йөрөтмәле урын. *Артлы ултырғыс. Артһыҙ ултырғыс. Ултырғыс аяғы.* ■ *Бер ултырғысҡа иплә кенә барып ултырҙым.* Т. Йәнәби. *Ул [Зыя] арҡаһы менән ултырғысҡа һөйәлә биреп ултырҙы.* М. Тажи.

**УЛТЫРҘАШ** *и.* Табында бергә ултырған кеше; табындаш. *Ултырҙаш булыу.* ■ *Ултырҙашының һүҙен хуплап, хәлфә баш һелкеп ултырҙы.* Х. Мохтар. *Юлдыбикә әбей кешелә күп булған, ҡунаҡҡа күп йөрөгән, ололар араһында күп ултырҙаш булған кеше.* Т. Хәйбуллин.

**УЛТЫРМА**[1] *и.* Әлекке һыу ятҡылыҡтары төбөнә төрлө ҡаты есем ултырыуҙан барлыҡҡа килгән тау тоҡомо. *Диңгеҙ ултырмалары.* // *Ултырма тоҙ. Ултырма тоҡомдар.*

**УЛТЫРМА**[2] *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың бер өйгә йыйылып, ҡул эше эшләп, һөйләшеп, уйнап-көлөп ултырған йыйыны. *Ултырмаға барыу.* ■ *Ултырма ҡыҙҙары шунда уҡ бәйләм-сигеүҙәрен алып, эшкә керешеп киткән булды.* Ф. Иҫәнғолов.

**УЛТЫРТҠЫС** *и.* Ниҙе лә булһа ергә ултырта, сәсә торған машина. *Картуф ултыртҡыс. Сөгөлдөр ултыртҡыс.*

**УЛТЫРТМА** *с.* **1.** Текә торошло. *Улар [егеттәр] өҫтәренә ултыртма яғалы пинжәк кейгән.* С. Агиш.

**2.** Текә, вертикаль хәлдә урынлаштырылған, беркетелгән. *Ултыртма ҡойма.* ■ *Был ныҡлы төҙөлгән ҡаралты. Уның стеналары, ултыртмалы ситәндән эшләнеп, эстән дә, тыштан да яҡшы итеп балсыҡ менән һыланған.* Ә. Вәли.

**УЛТЫРТМАЛЫ** *с.* Ултыртып ҡуймалы. *Ултыртмалы шәм. Ултырмалы итеү.* ■ *[Арыҫлангәле] тәҙрә төбөндә ултырған ултыртмалы көҙгөгә ҡарап, ҡалын ҡара сәстәрен артҡа тараны.* Ғ. Дәүләтшин.

**УЛТЫРТТЫРЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ултыртыу** 1—12. *[Йәмлиха:] Бына был алмағастарҙы .. совхоз баҡсаһынан күсертеп ултырттырғайныҡ.* Ғ. Әхмәтшин.

**УЛТЫРТЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **ултыртыу** 1, 2, 4—12. *Ҡапҡа төбөнә өҫтәл ултыртылған.* Д. Юлтый. *Ҡапҡа бағаналары ултыртылған, ҡапҡаһын ҡуйып өлгөрмәгәндәр.* Н. Мусин. *Ҡунаҡтар дәрәжәләренә ҡарап бүлеп ултыртылған.* Т. Хәйбуллин.

**УЛТЫРТЫУ** *к.* **1.** Ултырырға урын биреү, ултырырға тәҡдим йәки мәжбүр итеү. *Ултырғысҡа ултыртыу.* ■ *Гөлнур уны [Сәгиҙәне] диванға алып барып ултыртты.* М. Тажи. *Сафа, ҡулынан тартып, Барыйзы йәнәшенә ултыртты.* Р. Ғабдрахманов. / Берәй төрлө юл йөрөү сараһынан

урын биреү. *Атҡа ултыртыу. Машинаға ултыртыу.* ■ *Сафиулла ағайға ултыртып, мине Стәрлебаш ауылына уҡырға ебәрҙеләр.* Т. Йәнәби. *Зәңгәр генә дуға, ай күк юрға, ултыртмай ҙа уҙҙы хужаһы* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ултырып башҡара торған эш, шөғөлгә ҡушыу, урынлаштырыу. *Ашарға ултыртыу. Уҡырға ултыртыу. Эшкә ултыртыу.* / Урын, вазифа биреү, урынға тәғәйенләү. *Батша Таҙҙы .. үҙенең һанаты итеп ултыртты, ти* (Әкиәттән).

**3.** Урынлашҡан хәлдә ҡайҙалыр бер ерҙә тотоу. *Өйҙә ултыртыу. Тышта ултыртыу.*

**4.** Юғарынан осороп килтереп, ергә урынлаштырыу (самолётты).

**5.** Карапты берәй ҡаршылыҡҡа төртөлдөрөү. *Пароходты һайға ултыртыу.*

**6.** Йәшәр, торор өсөн урынлаштырыу. *[Сурагол:] Ерҙәребеҙ түрәләр тарафынан талап алынды, унда сит халыҡты килтереп ултырттылар.* Т. Хәйбуллин. / Йомортҡа баҫырға урынлаштырыу (ҡош-ҡортто). *Ҡаҙҙы баҫырға ултыртыу.*

**7.** Иректән мәхрүм итеп, йөрөү һ. б. мөмкинлеген сикләп, берәй ергә урынлаштырыу, ябыу. *Гауптвахтаға ултыртыу. Төрмәгә ултыртыу.* ■ *[Прокурор — Салихҡа:] Һинең завты, теге Әмирхановты, судҡа тиклем ҡулға алдыҡ. Сыртлановты беләһеңме, уны ла ултырттыҡ.* С. Агиш.

**8.** *һөйл.* Берәй төрлө режим һаҡларға мәжбүр итеү, берәй нәмәлә сикләү. *Диетаға ултыртыу.* / Дауа, дарман өсөн ниҙер эсенә төшөрөп күмеү. *Ләмгә ултыртыу. Тоҙло һыуға ултыртыу.*

**9.** Үҫһен өсөн тупраҡҡа урынлаштырыу. *Ағас ултыртыу. Бәрәңге ултыртыу. Сәскә ултыртыу.* ■ *Ҡайын үҫентеһен, тупрағы менән аҡтарып, кәберҙең баш осона ултырттым.* Ә. Вахитов. *Гурзуф бына. Пушкин йөрөгән урын. Бына ул ултыртҡан кипарис.* Ғ. Сәләм.

**10.** Мейескә, ҡорота торған урынға һ. б. урынлаштырыу, ҡуйыу (бешереү, яндырыу, ҡоротоу һ. б. өсөн). *Көлтәләрҙе сүмәләгә ултыртыу.* ■ *[Хужа ҡатын:] Бына янған мейескә аштарҙы ултыртырға кәрәк.* Д. Юлтый. *[Ғәзимә — Мәғфүрәгә:] Йәш киленгә әйт, анау бер күнәк һыйышлы ҡаҙанды бәләкәй усаҡҡа ултыртһын.* Һ. Дәүләтшина.

**11.** *һөйл.* Берәй төрлө итеп урынлаштырып, рәтләү, беркетеү, тегеү. *Ең ултыртыу.* ■ *Өҫтөнә килешле итеп, яғалары ултыртып тегелгән татар кәзәкейе кейгән .. берәүҙең эре генә баҫып килгәне күренде.* С. Агиш.

**12.** Нимәгә лә булһа тура торош биреү, торған, текә хәлдә урынлаштырыу. *Бағана ултыртыу. Ҡойма ултыртыу.* ■ *Фәриҙә нисек сакманы ултыртҡанын, ҡайһы арала сәкене тартып өлгөргәнен үҙе лә һиҙмәй ҡалды.* Н. Мусин./ Ниҙелер берәй урынға ҡуйыу, урынлаштырыу. *Биҙрәне ергә ултыртыу.* ■ *[Көршәктәрҙе] яурын баштарына ултыртып, йәш ҡыҙҙар .. тау шишмәһенә һыуға йөрөгән.* З. Биишева./ Ашар өсөн табынға ҡуйыу. *Сәй ултыртыу.* ■ *Атыңды илтеп ҡуяһыңмы, әллә аш ултыртайыммы, ҡарт?» — тине Мәғфиә.* Б. Бикбай.

**13.** *ҡусм. һөйл.* Ныҡ итеп һуғыу. *[Сурагол] Хәби байҙың томшоғона ғына туралап, берҙе ултыртты.* Т. Хәйбуллин.

**14.** *ҡусм. һөйл.* Алдау, һемәйтеү. *Шәйхетдин абзаң ҡоҙаларҙы ултыртты булһа кәрәк, колхоз тауыҡтарын егермешәр һум менән һыйланы.* Ш. Насыров. **Төп башына ултыртыу** 1) алдау, һемәйтеү. *[Хәсби:] Ошо йәшемә етеп, бер кемдән алданғаным юҡ ине, төп башына ултыртҡан бит мине.* Б. Бикбай; 2) бөлгөн хәлгә ҡалдырыу; бөлдөрөү.— *Ун йыл эсендә унлап председатель алмашынған. Береһе үреп, икенсеһе һүтеп, колхозды тамам төп башына ултыртҡандар.* Я. Вәлиев.

◆ **Тишек шүмәнгә ултыртыу** *ҡар.* шүмән [1].

**УЛТЫРТЫШЫУ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **ултыртыу** 1, 2, 4—11. *Ағас ултыртышыу. Аш ултыртышыу. Бағана ултыртышыу. Яға ултыртышыу.*

**УЛТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Кәүҙә ауырлығын аяҡтан ултырышҡа күсереп, берәй нәмәгә терәлгән хәлдә булыу. *Ергә ултырыу. Ултырғысҡа ултырыу. Ҡара-ҡаршы ултырыу. Лыпын ултырыу. Тубыҡланып ултырыу. Тороп ултырыу. Ултыра төшөү.* ■ *Блиндаждың эсе һыу. Ергә ултырһаң, артҡа һыу үтә. Шул сәбәпле сүкәйеп кенә ултырабыҙ.* Д. Юлтый. *Фәләхов ултырған ерендә сыҙай алмай башланы. Бер тора, бер ултыра, тағы тора, тағы ултыра.* С. Агиш./ Берәй төрлө юл йөрөү сараһынан урын алыу. *Атҡа ултырыу. Арбаға ултырыу. Машинаға ултырыу. Санаға ултырыу.* ■ *Ун биш көн инде беҙ тимер юлда сәйәхәт итәбеҙ. Поездан поезға ултырабыҙ, һаман юлды дауам итәбеҙ.* Д. Юлтый. *Шәрәфтең велосипедына ултырып, Тимер Янһаров район үҙәгенә китте.* Б. Бикбай.

**2.** Ниндәйҙер эш, шөғөлгә тотоноу өсөн урынлашыу. *Ашарға ултырыу. Сәй эсергә ултырыу. Уҡырға ултырыу. Эшкә ултырыу.* ■ *Егет шунда хәл йыйырға ултырған* (Әкиәттән)./ Урын, вазифа алыу һәм шул урында булыу. *Идарала ултырыу.* ■ *[Бибинур] элек уҡытыусы ине, балаларға бик ипле кеше. Хәҙер сельсоветта ултыра, секретарь.* Б. Бикбай. *Ағалары [Заятүләктән] көнләшеү генә түгел, атайыбыҙ үлгәс, хан булып ултырыр, тип ҡурҡа ла башлай.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**3.** Урынлашҡан хәлдә ҡайҙалыр бер ерҙә булыу. *Өйҙә ултырыу. Тышта ултырыу. Ҡояшта ултырыу.* ■ *Беҙ кис менән .. машинисткалар ултырған ҙур залға йыйылдыҡ.* С. Агиш. *Егет өйгә барып инһә, унда бик һылыу бер ҡыҙ ултыра, ти* (Әкиәттән)./ Табында, мәжлестә булыу. *Ошолай ҙа беҙҙең ултырыуҙар үҙе генә була бер ғүмер* (Халыҡ йырынан).

**4.** Юғарынан осоп килеп ҡуныу һәм шул ҡунған хәлдә булыу. *Аэродромға самолёт ултыра.* ■ *Ҡороған ағас башында бер ҡарға ултыра* (Әкиәттән)./ Осоп килеп тейеү. *Ҡаҙ йомортҡаһы ҙурлыҡ картуф шап итеп маңлайға ултырҙы* (Әкиәттән).

**5.** Йәшәр, торор өсөн төпләнеп урынлашыу һәм урынлашҡан хәлдә булыу. *Һыу буйында ултырған ауыл.* ■ *Күрше тирәләге ауылдар шул Ишәленән таралып ултырған, ти* (Әкиәттән). / Йомортҡа баҫыу (ҡош-ҡортҡа ҡарата). *Ултыр-*

*ған тауык.* ■ *Өй эсендә, ишек басмағында бер ҡаҙ ултыра алтын ояла.* Ш. Бабич.

**6.** Иректән мәхрүм ителеп, китә алмаçлыҡ хәлдә булыу. *Гауптвахтала ултырыу. Ҡамауҙа ултырыу. Төрмәлә ултырыу.* ■ *Зыя Тайморзин ике йылдан ашыуыраҡ ултырып, аҡланып сыҡты.* М. Тажи.

**7.** Берәй төрлө режимға буйһонорға мәжбүр булыу, берәй нәмә менән генә сикләнеү. *Диетала ултырыу.* ■ *Күрмәçтәй булып .. ике кило виноград ашағайным. Ул ҡәһәрең эскә тейә икән. Ике көн сохариҙа ултырҙым.* С. Кулибай./ Дауа, дарман өсөн ниҙер эсенә төшөп күмелеү. *Ләмгә ултырыу. Тоҙло һыуға ултырыу. Япраҡҡа ултырыу.*/ Бер нәмәһеҙ булыу. *Аҡсаһыҙ ултырыу. Утынһыҙ ултырыу. Эшһеҙ ултырыу.* ■ *[Сейәбикә:] Уҙған ҡыштағы йонсоуым барҙыр, .. өсәр көнләп тамаҡҡа алмай ултырҙым.* Т. Хәйбуллин. *Кейәүем тағы бер әмәлен табыр әле, тип ултыра бирә батша* (Әкиәттән).

**8.** Төбө менән урынлашҡан хәлдә булыу. *Бағана ултыра. Һауыт ултыра.* ■ *Бер ҙур быяла һауытта варенье ултыра.* Д. Юлтый. *Ҡамыр батырға япа-яңғыҙ ултырған бер өй күренгән* (Әкиәттән).

**9.** Ниҙеңдер өçтөнә һырып йәки төбөнә төшөп, тотош ҡаплау. *Юшкын ултыра. Һыу төбөнә ултырған ләм.* ■ *Саң Зөлкәрнәйҙең күлдәктәренә, тамаҡ төптөренә, ҡолаҡтарына, ауыҙына, танау тишектәренә ултыра.* Ғ. Дәүләтшин./ Кәпләнеп төйөлөү, тығылыу. *Шул гәйебем төйөр булып, ултырҙы бит тамаҡҡа.* М. Кәрим.

**10.** Батып, баçылып төшөү. *Арба янтайып, лып ултырҙы. Сокорға тулған һыу кусәрҙән аша һукты.* М. Тажи. *[Кәримдең] төпкә ултырған күҙҙәре ҙурайып ҡалған.* Я. Хамматов.

**11.** Тартылып бәләкәсәйеү (кейем-һалымға ҡарата).

**12.** *-п* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында эш-хәрәкәттең дауамлы булыуын белдерә. *Китеп ултырыу. Ишетеп ултырыу. Уйланып ултырыу. Сәскә атып ултырыу.* ■ *Ҡаҙан тулы кош ите бешеп ултыра ине, ти* (Әкиәттән).

● *Ҡунаҡ әҙ ултырыр, күп һынар.* Мәҡәл. *Ултырған ҡыҙ урынын табыр.* Мәҡәл. *Шыгырлаған ағас ҡырҡ йыл ултырыр.* Мәҡәл.

**УЛТЫРЫШ**[1] *и.* **1.** Бер төрлө идара ағзаларының үҙ-ара һөйләшеп, ниҙелер хәл итә торған йыйылышы; кәңәшмә. *Ултырыш ҡарары. Ултырыш үткәреү. Ултырышҡа барыу.* ■ *Кисәге правление ултырышы Әхнәфтең малсылыҡ планының үтәлешен тәьмин итеү саралары тураһындағы докладын тыңланы.* Д. Исламов.

**2.** Ултырыу рәүеше. *Сәгәттәр буйы беҙ уның менән секреткала ултырҙыҡ. Ул үҙенең ултырышын үҙгәртмәне һәм бер һүҙ өндәшмәне.* Д. Юлтый.

**УЛТЫРЫШ**[2] *и.* Кәүҙәнең ултыра торған өлөшө; оса. *Ултырыш нервылары. Ултырыш һөйәге.*

**УЛТЫРЫШ**[3] *и. ҡар.* **ултыраҡ**[2].

**УЛТЫРЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ултырыу** 1, 2. *Батырҙар ултырышып, ашай башлаған* (Әкиәттән).

**УЛЪЯ** *и. иçк.* **1.** Ҡулға кергән мал, төшкән файҙа; табыш. *Улъяға батыу.* ■ *Был иген — Аҡназарҙың өй эсенә бик күп йыл буйы көттөрөп килгән өлкән бер улъя.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Яу ҡырында ҡулға төшөргән мал; ғәнимәт, трофей. *Ҡаҙаҡ ханы Әбелхәйер, .. Сәйет батырҙы баш итеп, башҡорт илен баçырға, улъя алып ҡайтырға ҡушып ебәрә* (Хикәйәттән).

● *Юғалып табылған мал — улъя.* Мәҡәл.

**УЛЬТИМАТИВ** [*рус.* ультимативный] *с.* Ультиматум рәүешендәге; ҡәтғи. *Ультиматив талап. Ультиматив рәүештә талап итеү.*

**УЛЬТИМАТУМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Шарт үтәлмәгән осраҡта дипломатик мөнәсәбәттәрҙе өҙөү һәм көс ҡулланыу менән янап, хөкүмәткә йәки хәрби командованиеға ҡуйылған ҡәтғи талап. *Ультиматум белдереү.*/ Ҡурҡытыу, янау менән ҡуйылған ҡәтғи талап. *Ультиматум ҡуйыу.*

**УЛЬТРАҠЫÇҠА** [*рус.* ультра ⟨ *лат.* + төрки] *с. физ.* Үтә ҡыçҡа.

◆ **Ультраҡыçҡа тулҡын** 1 см-ҙан 10 м-ға тиклемге оҙонлоҡтағы радио тулҡыны.

**УЛЬТРАТАУЫШ** [*рус.* ультра ⟨ *лат.* + төрки] *и.* Кеше ҡолағы ишетә алмаçлыҡ юғары йышлыҡтағы тирбәлеш.

**УЛЬТРАФИОЛЕТ** [*рус.* ультрафиолетовый]: **ультрафиолет нурҙар** *физ.* спектрҙың фиолет һәм рентген нурҙары араһындағы интервалды алып торған күҙгә күренмәç электромагнит нурҙары.

**УМАҠ: умаҡ атыу** *диал.* тәкмәс атыу (*ҡар.* **тәкмәс**).

**УМАҠА** *р. диал.* Баш аша, баш түбән. *Умаҡа ҡолау.*

**УМАҠАТАН** *р. диал.* Баш аша, баш түбән. *Умаҡатан барып төшөү.*

**УМАҠЛАУ** *ҡ. диал.* Тәкмәсеү, тәкмәсләү.

**УМАРТА** *и.* Бал ҡорттары өсөн таҡтанан йәки түмәрҙе соҡоп яһалған оя. *Дадан умарта. Түмәр умарта. Умарта кейәһе. Умарта ҡапҡасы. Умарта баҙы.*

**УМАРТАЛЫҠ** *и.* Умарталар торған урын. *[Хәсбулат олатай:] Боронғо йәйләү урынында хәҙер колхоздың шәп умарталығы бар. .. Ана шул данлы умарталыҡта ҡарауылсы мин.* З. Биишева.

**УМАРТАСЫ** *и.* Ҡорт ҡарау менән шөғөлләнгән кеше. *Умартасы булып эшләү.* ■ *Аласыҡтың стеналарында атайымдың мылтығы, моҙға, күрек, күҙелдерек кеүек умартасыға кәрәкле нәмәләр элеүле тора.* Н. Мусин.

**УМАРТАСЫЛЫҠ** *и.* Бал ҡорто аçрау эше. *Умартасылыҡ менән шөғөлләнеү.*

**УМАС** *и. диал.* Ыумас.

**УМРАУ** *и.* **1.** (*йәки* **умрау һөйәге**) Ҡалаҡ һөйәге менән түш һөйәген тоташтырып торған һөйәк.

**2.** *диал.* Яурын.

**УМРАУЛАУ** *ҡ. диал.* **1.** Яурынлау. *Умраулап алып китеү.*

**2.** *күсм.* Көсләшеү, көсөргәнеү, серәшеү. *[Күрташ:] Бей әйтте бит инде әйтер һүҙен, умраулап һин дә ныҡышма.* Х. Ғәбитов.

**УМРАУЛЫ** *с. диал.* Яурынлы, яурынтаҡ. *Умраулы кеше.*

**УМРАУСА** *и. диал.* Аллмиҙеү. *Ҡарасәс умраусаһын бәйләп, күнәктәрен алып, ашығып сығып китә.* Х. Ғәбитов.

**УМШЫРАЙЫУ** *к. диал.* Өнрәйеү.

**УМЫРҘАЯ** *и.* Лютиктар ғаиләһенә ҡараған иртә яҙ сәскә ата торған тетмәкәй япраҡлы, эре сәскәле үлән. *Күк умырҙая. Һары умырҙая.*

**УМЫРТҠА** *и.*, **умыртҡа һөйәге 1.** Арҡа һөйәгенең бер өлөшө.

2. *кар.* **умыртҡалыҡ**.

**УМЫРТҠАЛЫҠ** *и.* Айырым умыртҡаларҙан төҙөлөп, арҡа буйынан үткән оҙон һөйәк; арҡа һөйәге.

**УМЫРТҠАЛЫЛАР** *и. зоол.* Умыртҡа һөйәкле йәнлек, хайуандар төркөмө. *Түбәнге умыртҡалылар. Юғарғы умыртҡалылар.*

**УМЫРТҠАҺЫҘҘАР** *и. зоол.* Умыртҡа һөйәкһеҙ йәнлектәр төркөмө.

**УМЫРТЫУ** *к. йөкм. кар.* **умырыу.**

**УМЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **умырыу** 1. *Умырылып төшөү.*

**УМЫРЫУ** *к.* 1. Ниҙе лә булһа эләктереп, киҫәкләтә өҙөү, йолҡоу; емереү, аҡтарыу. *Аҡселән йылғаһы яҙ һайын ярҙы умырып, ауылға яҡынлаша башланы.* Б. Бикбай. *Яртышар метр киңлектә кәҫтәрҙе умырып, әйләндереп ташлайһың.* А. Карнай. *Ауылға ике бомба төштө. ..Абдрахманов тигән офицерҙың атының арт ягын умырып алып киткән.* С. Әлибаев.

2. Ҙур итеп ҡабыу. *Закир аҡ каласты умыра тешләп, .. билмәнгә тотондо.* З. Биишева. *Умырғаның май булһын, тулғатҡаның ул булһын* (Туй йырынан).

3. *күсм.* Мул эш итеү, күп итеү. *Емереп эшләп, аҡсаны умырып алыу.* ■ *Ямғыр арыш баш ҡоҫҡан мәлдә ике-өс тапҡыр умырып яуҙы ла шуның менән туҡтаны.* Я. Хамматов.

**УН** *төп. һ.* 10 һаны. *Ундан бишге алыу. Ун ике.*/ Кем йәки нәмәнең 10-ға тиң иҫәбе. *Ун өй. Ун һарыҡ. Ун сакырым. Ун грамм.*

● *Улһыҙҙың мәшәкәте бер булыр, уллының мәшәкәте ун булыр.* Әйтем.

**УНАН** *р.* 1. Ул ерҙән, ул урындан. *Келт итеп сәгәт өҫтөндәге бәләкәй ҡапҡас асылды ла унан кәкүк сыкты.* Б. Бикбай.

2. Берәй эш-хәл булғас, шунан һуң. *Унан һуң.* ■ *Председатель [яҙыуҙы] алып ҡарағас, бер аҙ ҡарап торҙо, унан һаҡ рәүештә кыңғырау шылтыратты.* С. Агиш. *Тауыҡ тағы осрап, Күркәнән хәл һораны. Унан һүҙҙе башланы бергә эшләү тураһы.* Ғ. Амантай.

**УНАН-БЫНАН** *р.* 1. Төрлө ерҙән. *Гөлнур өҫтәлдәге һәр төрлө кағыҙ, папкаларҙы унан-бынан караштырып алды.* М. Тажи.

2. *күсм.* Нисек етте шулай; арлы-бирле. *Өмөтбайҙың өйө кәкре-бөкрө ҡайын ағасынан унан-бынан һупалап кына яһалған.* Ғ. Дәүләтшин.

**УНАР** *бүл. һ.* Һәр бере ундан торған, һәр бере унға тиң. *Унарҙан бүлеү.* ■ *Еләндең салғыйҙарына, бөйөрҙәренә, билдәренә һирәклэп кенә ҡаҙаған унар, ун бишәр тинлек көмөш тәңкәләр .. ялтырап тора.* Ғ. Дәүләтшин.

**УНАРЛАҒАН** *сама һ.* Бер нисә ун тирәһе. *Унарлаған кеше. Унарлаған мең.*

**УНАРЛАП** *р.* Унар итеп, унар иҫәбенән, унарҙан. *Унарлап һанау.*

**УНАРЛЫҠ** *с.* Унар һумлыҡ. *Гел унарлыҡ аҡса.*

**УНДА** *р.* 1. Ул урында, ул ерҙә. *Баҫкыс яңына сыктым. Унда бер нисә кеше тәмәке тарта ине.* С. Агиш.

2. Ул урынға, ул ергә. *Батша унда үҙе бармаҡсы булды* (Әкиәттән).

**УНДА-БЫНДА** *р.* 1. Төрлө урында, төрлө ерҙә. *Унда-бында бесән эҫкерттәре күренә.* М. Тажи.

2. Төрлө яҡҡа, төрлө ергә. *Инде сыкты аҡлылар һәм унда-бында саптылар.* Ш. Бабич.

**УНДАҒЫ** *с.* Ул урындағы, ул ерҙәге. *«Хөсәйениә» мәҙрәсәһенә инергә тырышып ҡараһам да мине алманылар. Апытағас, ундағы Зәйнулла хәҙрәт мәҙрәсәһенә барып индем.* Т. Йәнәби.

**УНДАЙ** *с.* Ул рәүешле, улай. *Ундай эш күлымдан килһә, һинең өсөн йәнем фиҙа.* З. Биишева. *Йәш ваҡытта беҙҙә лә ундай йөрөүҙәр бар ине.* Ш. Бабич.

**УНДАРСА** *сама һ. кар.* **унарлаған.**

**УНДА-ҺАНДА** *р.* Һирәк-мирәк төрлө ерҙә. *Ағастарҙың коро япраҡтары унда-һанда ғына ҡалдылар.* Д. Юлтый.

**УНИВЕРМА́Г** [*рус.*] *и.* Универсаль магазин. *Балалар универмагы.*

**УНИВЕРСА́Л** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Төрлө һөнәргә эйә кеше. *«Бөтәбеҙ ҙә шулай универсалбыҙ,— ти иптәш,— хәҙер бит комбайнға йәки тракторға ғына ҡарап ята торған заман түгел».* «Совет Башҡортостаны», 1969, 22 март.

**УНИВЕРСАЛЬ** [*рус.* универсальный ‹ *лат.*] *с.* 1. Бөтә нәмәне эсенә алған, бөтәһен солғаған. *Универсаль белем.*/ Күп маҡсатҡа яраҡлы, күп төрлө тәғәйенләнеше булған. *Универсаль двигатель. Универсаль станок.* ■ *[Зарифа] штопорлы, ҡалаҡлы, беҙле, консерва аса торған нәмәле универсаль бәкене лә кағыҙға төрөп һалды.* С. Агиш.

2. Күп, төрлө-төрлө күнекмәгә, һөнәргә, белемгә эйә булған; күп яҡлы. *Универсаль кеше.*

**УНИВЕРСИТЕ́Т** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* 1. Төрлө тәбиғәт һәм йәмғиәт фәндәре буйынса айырым бүлектәре булған юғары уҡыу йорто йәки ғилми ойошма. *Башҡорт дәүләт университеты. Университет белеме. Университетта уҡыу.*/ Шул уҡыу йорто йәки ойошма урынлашҡан бина.

2. Халыҡтың дөйөм һәм ғилми-политик белемен күтәреү менән шөғөлләнгән уҡыу учреждениелары исеме. *Марксизм-ленинизм университеты. Ата-әсәләр университеты.*

**УНИКАЛЬ** [*рус.* уникальный] *с.* Һирәк, берҙән-бер даналағы. *Уникаль комартҡы. Уникаль әҫәр.*

**У́НИКУМ** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Һирәк осрай торған, берҙән-бер даналағы нәмә.

**УНИСО́Н** [*рус.* ‹ *ит.*] *и. муз.* Бер үк юғарылыҡтағы бер үк тауыштың йәки төрлө октаваламы бер тигеҙ тауыштарҙың бер юлы яңғырашы. *Оҙон көй .. йырсы менән ҡурайсының унисонлы*

*дуэты рәүешендә башҡарыла.* «Башҡорт халыҡ йырҙары», 1954.

**УНИФИКА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ниҙендер бер рәүешкә килтерелеше. *Унификация үткәреү.*

**УНЛАҒАН** *сама h.* Ун тирәһе, унға яҡын. *Унлаған кеше.*

**УНЛАП** *сама h.* Унға яҡын, ун тирәһе. *Унлап бала.*

**УНЛЫ** *с. һөйл.* Үлсәмә ун берәмеккә тиң. *Унлы лампа яҡты яна.* Б. Хәсән.

**УНЛЫҠ** *и. һөйл.* Ун һумлыҡ аҡса.

**УНСА** *р.* Ул тиклем. *[Ныяҙгол:] Унса күтәүҙе һатмай, ҡайҙа ҡуяһың?* Һ. Дәүләтшина.

**У́НТЕР** [*рус.*] *и. һөйл.* Унтер-офицер.

**У́НТЕР-ОФИЦЕ́Р** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Революцияға тиклем рус армияһында һәм ҡайһы бер сит ил армияларында һалдаттарҙан кесе команда составы дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше. *Андреев ике көн занятиеға сыҡмаған, яңы килгән унтер-офицер уға бәйләнгән, наряд бирен маташҡан.* Д. Юлтый.

**УНҺЫҘ** *күрһ. а.* Ул кешеһеҙ йәки ул нәмәһеҙ. *[Зөлхизә:] Мин дә ярат м. Мин дә унһыҙ йәшәй алмайым.* З. Биишева.

◆ **Унһыҙ ҙа** ул хәл йәки нәмәнән башҡа ла; былай ҙа. *Буран һепертә. Ҡыштың унһыҙ ҙа тар ғына юлын ҡар баҫа.* Р. Солтангәрәев.

**УНЫНСЫ** *рәт h.* Урын тәртибе 10 менән билдәләнгән. *Унынсы класс. Сиратта унынсы кеше булып тороу. Унынсы йылдар* [*берәй йөҙ йылдың 10-ынан алып 20-һенә тиклемге йыл.*

**УНЫҢСА** *р.* **1.** Уның уйынса. *Унынса, барыһы өсөн Байназар гәйепле булып сыға.* Б. Бикбай.

**2.** Уның кеүек. *Бәлки, нисек кенә тырышһам да хикәйәтте мин унынса оҫта, халыҡсан итеп һөйләй алмам.* З. Биишева.

**УҢ**[1] *с.* **1.** Кәүҙәнең һул тарафына ҡаршы яғындағы. *Уң аяҡ. Уң ҡул. Уң күҙ. Уң колаҡ* / Һул ҡулға ҡаршы ҡул тарафында урынлашҡан. *Янгол секунд эсендә уң яҡтағы стражниктың ҡамсыһын тартып алды.* Һ. Дәүләтшина. / Ағым ыңғайына ҡарап баҫҡанда был яғында урынлашҡан (йылға ярына ҡарата). *Ағиҙелдең уң яҡ яры.*

**2.** Тышҡы, өҫкө (тауар йәки кейемдә). *Күлдәктең уң яғы.* // *Тауарҙың уңы.*

**3.** Политик һәм ижтимағи тормоштағы алдынғы, прогрессив йүнәлештәргә ҡаршы; консерватив, реакцион. *Уң партия. Уң ҡараштағы кеше.*

**УҢ**[2] **1.** *и.* Эш, тормоштағы яҡшы, теләккә ярашлы һөҙөмтә. *[Тимерғәле:] Һай-һай, ауыр хәл килеп сыҡты. Көтөлмәгән нужа. Алла уңын бирһен инде.* Һ. Дәүләтшина. *Яуға үҙе бармаһа, барғанға уң бирмәһә ... ил батыры булырмы?* «Ҡараһаҡал».

**2.** *с.* Теләккә тура килгән ыңғай һөҙөмтәле, теләккә, талапҡа ярашлы; яҡшы. *Ошондай уң һунарҙан ҡайтыу менән Ҡарабай бөтә ауыл халҡын саҡырып, йыйын уҙғарған.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Ауыр юлдар йырып, көрәш еңеп, килеп мендек хәҙер ҡалҡыуға. Инде эш уң.* Ғ. Амантай.

◆ **Уң булһын** яҡшы теләк теләгәндә әйтелә. *Эшең уң булһын. Юлың уң булһын.*

**УҢ**[3] *и. иҫк.* Ал, алғы яҡ.

**УҢАЙ**[1] *и.* **1.** Йәтешле, ярашлы хәл йәки мәл. *Уңайы сығыу. Уңайын табыу.* ■ *Бер нисә һалдат ҡасыу уңайын ҡарап, вокзалға ла барып килде.* Д. Юлтый. *[Һалдаттар:] Инде бер уңайы килгәндә, былай ғына ҡалдырмабыҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ниндәйҙер эш-хәлгә мөнәсәбәтле шарт. *Байрам уңайы менән. Туй уңайынан.* ■ *Иҫке армияла әрәм үткән ғүмерҙәренә ҡайғырып алдылар. Көтөм ағай ошо уңай менән .. көмөш миҙалы тураһында тағы бер һөйләп алды.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Эш-хәлдең теләккә ярашлы яҡшы йүнәлеше. *Исән гено йөрөп, һауҙар ҡайтһам, эштәр китер ине уңайға* (Халыҡ йырынан).

**4.** *диал.* Ыңғай.

**УҢАЙ**[2] *с.* Эш, хәрәкәт өсөн ярашлы; яйлы, йәтеш, уңайлы. *Уңай ваҡыт. Уңай булыу.* // *Уңай тура килеү.* ■ *Сиражи менән Локман уңай бер төн табып, тәҙрә аркыры сығып ҡасты.* И. Насыри. *Эштең уңай килеп торғанына шатланып, йүгерә-атлай тышҡа сыҡтым.* Н. Мусин.

**УҢАЙЛАНЫУ** *ҡ.* Уңайға[2] әйләнеү, уңайлы (1 мәғ.) булыу. *Ҡул бөйөндә шыйыҡ ҡына томан күтәрелде. Беҙҙең өсөн уңайланды.* Д. Юлтый.

**УҢАЙЛАУ** *ҡ.* **1.** Уңайлы (1 мәғ.) итеү. *Халыҡты ҡарар өсөн стена буйына уңайлап һөйәндем.* С. Агиш.

**2.** Уңайға, яйға һалыу. *Эште уңайлау.* ■ *Белмәгән ҡаҙаҡта бар, ноғайҙа бар, иң әүәл иман ғилемен уңайлап ал.* Аҡмулла.

**УҢАЙЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Ҡулайлы, йәтеш итеү. *Эште уңайлаштырыу.*

**УҢАЙЛАШЫУ** *ҡ.* Ниҙендер ҡулайына, яйына йәтешләнеүе; ҡулайлашыу, ярашлашыу. *Тормоштың уңайлашыуы.*

**УҢАЙЛЫ** *с.* **1.** Эш, хәрәкәт өсөн ярашлы; яйлы, йәтеш, ҡулайлы. *Уңайлы шарттар. Уңайлы эш. Уңайлы булыу. Уңайлы итеп ултырыу.* // *Юлдан йөрөү уңайлы.* ■ *Төн ҡараңғы, аҙырак ямғыр ҙа һибәләй. Теләп алған кеүек уңайлы ваҡыт.* Б. Бикбай. *Партизандар .. дошманға аҙаҡҡы, хәл иткес ҡаты һөжүмгә әҙерләнеп, уңайлы моментты ғына һағалап торҙо.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ҡулланыу, тотоноу өсөн йәтеш; яйлы, ипле. *Уңайлы балта.* ■ *Хәҙер инде өс төрлө фекер тыуҙы. .. Хәҙер шуларҙан иң уңайлыһын, ҡулдан килә торғанын, һайларға кәрәк.* Д. Юлтый.

**УҢАЙЛЫҠ** *и.* Эш, хәрәкәт өсөн ярашлы, йәтеш шарт. *Тормоштағы уңайлыҡ. Эштәге уңайлыҡ. Уңайлыҡтар тыуҙырыу.* ■ *Уҡытыусылар торлаҡ һәм тейешле коммуналь уңайлыҡ менән тәьмин ителде.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1967, № 7.

**УҢАЙҺЫҘ** *с.* **1.** Эш, хәрәкәт өсөн ярашһыҙ; яйһыҙ, ҡулайһыҙ. *Уңайһыҙ урын. Уңайһыҙ шарттар. Уңайһыҙ булыу.* // *Уңайһыҙ йығылыу. Уңайһыҙ ятыу.* ■ *Үҙе әле яҡшылап белеп*

*бөтмәгән кешеләр алдында доклад яһарға кәрәк. Егеткә уңайһыҙырак, ниңәлер ярһыта.* Б. Бикбай. *Көн һайын миндә бәхетһеҙлек кенә арта бара, яйһыҙ, уңайһыҙ, кыыйһыҙ юлына тарта бара.* Ш. Бабич.

**2.** Ҡулланыу, тотоноу өсөн яйһыҙ; ипһеҙ. *Уңайһыҙ сүкеш.* ■ *Рус винтовкаһы Польшалағы комло окоп өсөн иң уңайһыҙ винтовка. Уның затворы асык. Һәр вакыт уға ком тула. Ком тулһа, затворын асыу, ябыу эше аткан һайын ауырая.* Д. Юлтый. *[Батша:] Кисә уң кулымды кимәлйеткәйнем. Ҡалак тотоп булмай. Һул кул менән уңайһыҙ* (Әкиәттән).

**3.** *күсм.* Ауыр, кыйын, күңелһеҙ. *Уңайһыҙ хәлдә калыу. // Уңайһыҙ тойолоу.* ■ *— Ярай, башлайык,— тине Тимер, уңайһыҙ хәлдән тиҙерәк котолорға теләп.* Б. Бикбай. *Ҡаш аҫтынан ғына күҙ һирпеп алдым. Уңайһыҙ булып китте. .. Эргәмдә бая мин төртөп инеп киткән йыуан катын тора.* Р. Солтангәрәев.

**4.** *күсм.* Килешһеҙ, урынһыҙ, бик үк яҡшы, әҙәпле түгел. *Уның [Мостафаның] һүҙенә бер кем дә яуап кайтарманы. Уның һүҙен кеүәтләү кыҙҙар алдында уңайһыҙ ине.* Д. Юлтый. *Былай өңдәшмәй-нитмәй алъюсыкка йөрөү бик уңайһыҙ бит инде.* Т. Йәнәби.

**УҢАЙҺЫҘЛАНЫУ** *к.* Уңайһыҙ, ауыр, кыйын хәл кисереү, уңайһыҙлыҡ (2 мәғ.) һиҙеү. *Уңайһыҙланып ултырыу. Әйтергә уңайһыҙланыу.* ■ *Хәмит уңайһыҙланып, кыҙарып китте.* Б. Хәсән. *Мәрйәм мине каршы алды. Кыҙыулык менән уның кулын каты кыҫып күрештем, үҙем дә уңайһыҙландым.* Д. Юлтый.

**УҢАЙҺЫҘЛАУ** *с.* Уңайһыҙ, ауыр, кыйын хәлгә куйыу. *Кешене уңайһыҙлау.* ■ *Кара, беҙҙең кашка быҙау, кара, кандай уйынсак! Һикерә йөрөп уйнар ине, уңайһыҙлай муйынсак.* Ғ. Амантай.

**УҢАЙҺЫҘЛЫҠ** *и.* **1.** Эш, хәрәкәт өсөн ярашһыҙ, кулайһыҙ, яйһыҙ шарт. *Уңайһыҙлык сығыу. Уңайһыҙлык тыуҙырыу.* ■ *Юлға һалған калын, йомшак карҙар унайһыҙлык яһай бигерәк тә.* Д. Юлтый.

**2.** Уңайһыҙ, ауыр, кыйын хәл. *Уңайһыҙлыкка осрау. Уңайһыҙлык хис итеү.* ■ *[Ғәмир:] Әйҙә, тигәс, әйҙә. Бер уңайһыҙлығы ла юк.* Б. Бикбай.

**УҢАЛДЫРЫУ** *к. кар.* **уңалтыу.**

**УҢАЛТЫУ** *к.* Ит үрҙереп, төҙәлтеү. *Атка менегеҙ, ирҙәр, ағалар, асылһын әйҙә иҫке яралар! Яраларҙы ирек уңалтыр, яуыз дошман башын юғалтыр!* Салауат Юлаев.

**УҢАЛЫУ** *к.* Ит үреп, төҙәлеү. *Яралар ҙа күптән уңалған, тик тән-йәндә яман эҙ калған.* С. Кулибай.

**УҢАРСА** *р. диал. кар.* **уғаса** 2.

**УҢАРЫУ** *к. диал.* Төҫ касыу; ағарыу. *Шәмсиә килен бер уңарып, бер кыҙарып, йән тиргә батып ултыра.* Ш. Насыров.

**УҢҒАҠ** *с.* Көнгә уңыусан. *Ал яулыкка кыҙыкмағыҙ, ал яулык уңғак була* (Халыҡ йырынан).

**УҢҒАН** *с.* Эшкә шәп; егәрле, эшлекле. *[Гәрәй:] Ай-һай, уңған кеше булып сыктың һин, Әскәп һылыу! Кара инде, кара, иҙәндәрен балауыҙҙай һап-һары итеп кырып йыуған, өй эсе йәннәтме ни — йыйнак, ашы бешеп ултыра.* Б. Бикбай. *[Кәмәрҙең] карты ла бик уңған кеше. Йәш сағында әллә ни тиклем бүре һуккан, әллә нисәмә төлкө алған.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Ир уңғаны илгә яраған.* Әйтем. *Уңған кеше эш ырата, уңмағаны төш юрата.* Әйтем.

**УҢҒАНЛЫҠ** *и.* Уңған кешегә хас сифат, эшкә булған егәрлелек. *Уңғанлык күрһәтеү.* ■ *Уның [Сараның] етеҙ хәрәкәттәрендә, кейем-һалымында, әҙерләгән ашамлыктарының тәрбиәлелегендә ниндәйҙер бөхтәлек, уңғанлык күренеп тора ине.* Б. Бикбай. *Ауыл тормошон яктыртыуҙа ниндәйҙер планлы хәстәрлек, уңғанлык күҙгә бәрелә.* К. Мәргән.

● *Матурлык түйҙа кәрәк, уңғанлык көн дә кәрәк.* Әйтем.

**УҢДЫРЫУ** [1] *к.* **1.** Теләк, талапка яраған яҡшы һөҙөмтәгә килтереү. *Эште уңдырыу.* ■ *[Председатель:] Хисамый ағай, калала ни уңдырырға уйлайһың?* К. Мәргән.

**2.** Мул итеп үҫтереү.— *Бына ошо икән Самарҙың иген уңдыра торған кара тупрағы.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Яҡшы сифатлы итеп өлгөртөү. *Камырҙы уңдырыу.*

**УҢДЫРЫУ** [2] *к. йөкм. кар.* **уңыу** [2]. *Күлдәкте уңдырыу.*

**УҢДЫРЫШЛЫ** *с.* Игенде һ. б. нәмәне яҡшы үҫтереү сифатына эйә. *Уңдырышлы тупрак.*

**УҢДЫРЫШЛЫҠ** *и.* Игенде һ. б. нәмәне үҫтерә торған сифат. *Тупрактың уңдырышлығы.*

**УҢДЫРЫШҺЫҘ** *с.* Игенде һ. б. нәмәне яҡшы үҫтереү сифатына эйә булмаған. *Уңдырышһыҙ тупрак.*

**УҢДЫРЫШҺЫҘЛЫҠ** *и.* Игенде һ. б. нәмәне үҫтерә алмай торған насар сифат. *Тупрактың уңдырышһыҙлығы.*

**УҢҠ-УҢҠ** *окш.* Яҡшы ат юртҡан саҡта эсенән ишетелгән тауышты белдергән һүҙ. *Уңк-уңк итеү.*

**УҢҠЫЛДАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **уңкылдау.**

**УҢҠЫЛДАУ** *к.* Уңк-уңк итеү, уңк-уңк килеү. *Ат шәп булғас, шәп инде. Кара әле, уңкылдап кына юртып бара бит!* С. Агиш.

**УҢЛАУ** *к. диал. кар.* **уңдырыу** [1] **1.** *Уйы яман Каракәмдең, тәксир, тине ... Хоҙай уңлап, кулына төшөрә алһаң, йәнен инде хак юлына тапшыр, тине.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**УҢЛЫ-ҺУЛЛЫ** *р.* Бер уң, бер һул яҡка, әле уң, әле һул яҡлап. *Кәкүктәр ҙә томшоктарын үргә күтәреп, уңлы-һуллы әйләнеп, .. көмөш тауышы менән урманды яңғырата.* Т. Хәйбуллин. *Ғәләү .. Талипты уңлы-һуллы сабып ебәрҙе.* Р. Ғабдрахманов.

**УҢМАҒАН** *с.* Эшкә йүнһеҙ, булдыкһыҙ. *Уңмаған кеше. Уңмаған булыу.*

● *Уңмаған ат тәртә һындыра, уңмаған катын ирен туҙҙыра.* Әйтем.

**УҢТАЙЛАНЫУ** *к. диал.* Әҙерләнеү, йәтешләнеү. *Карас батыр .. һаҙағын алып, атыр өсөн уңтайлана* (Әкиәттән).

**УҢЫУ** [1] *к.* **1.** Теләк, талапка яраған яҡшы һөҙөмтәгә килеү. *Эш уңа.* ■ *[Ғәйзулла бабай-*

*ҙың] тәүге осраған балыкка яҙа төрткән сактарында: — Эләкмәне, юл уңмас ахыры, хәйерсе,— тип һөйләнеп, .. кире әйләнеп, кайтып киткән сактарын да беләм.* Н. Мусин. *[Шулгән:] Ул Яуыздан тынмабыҙ. Һораганын береу менән, тыңла, кыҙым, уңмабыҙ.* «Акбуҙат».

**2.** Кемдән йәки нимәнәндер изгелек, якшылык күрергә ирешеү; йәлсеү. *Катындан уңыу. Эштән уңыу.* ■ *[Фатима:] Председателдән уңманык беҙ, .. атка ултырып, тәмәкеһен боркоратып, тик йөрөүен белә, яланга сыгып та караганы юк.* Б. Бикбай.— *Был киленебеҙҙән уңырбыҙ, ахыры. Өлкән килен кеүек белдекһеҙ, йыбыткы булмаҫка окшай,— тине [Йомай әбей].* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Мул булып үҫеү. *Еләк уңа. Емеш уңа. Иген уңа.* ■ *[Тәнзилә әбей:] Сәгиҙә балакай, кара әле: быйнауында әберсә бик уңган булган икән.* М. Тажи. *Бойҙай уңманы. Ул башакланып, һутлана гына башлаганда көн урталарында аяуһыҙ кыҙҙырган кояш эҫеһенә сыҙамай бөрөштө.* Я. Хамматов.

**4.** Якшы сифатлы булып өлгөрөү. *Камыр уңа.* ■ *Яраштырылган аш дөрөҫтән дә уңып сыкты. Ап-ак ондан дүрткелләп, шакмаклап кыркылган һалма һалынган.* Т. Хәйбуллин. *Кинйә улының кәләше бешергән икмәк ашап туйгыһыҙ булып уңган, ә калган ике килененең икмәге, таш кеүек, ватып алгыһыҙ каты булган, ти* (Әкиәттән).

● *Атың ашамһак булһа — уңдың, катының ашамһак булһа — бөлдөң.* Әйтем. *Уңмаган юлды кыума.* Әйтем.

**УҢЫУ** [2] *к.* Тәүге асык төҫтө юғалтыу. *Кешеләр араһынан .. өҫтөнә көнгә уңып, агара башлаган һоро буҫтау гимнастёрка кейгән сандыр буйлы бер йәш кеше күтәрелде.* М. Тажи *[Һөнәрсегә] тиклем быңдай көршәкте эшләй белгән дә, ундай мәңге уңмаҫ буяуҙарҙы кулланган да кеше булмаган.* З. Биишева.

● *Үтә кыҙыл тиҙ уңа.* Мәкәл.

**УҢЫШ** *и.* **1.** Эштә, тормошта ирешкән якшы һөҙөмтә. *Эштәге уңыш. Уңышка өлгәшеү.* ■ *Әле яңы гына танышып та, шундай якшы мөнәсәбәттә булгас, бик ҙур уңыш һанайһың бит инде уны.* Т. Йәнәби. *«Эксперимент» Сәгиҙәгә әллә ни уңыш килтермәне, киреһенсә, балалар араһында шау-шыу тыуҙырыуга сәбәп кенә булды.* М. Тажи.

**2.** Иген йәки емеш-йәшелсәнең майҙан берәмегенән алынған күләме. *Игендең уңышы. Уңыш алыу. Уңышты күтәреү.* ■ *[Тимер:] Беҙ быйыл былтыргыга караганда ике тапкыр артык сәстек. Шик юк, уңышты ла күберәк алырбыҙ.* Б. Бикбай.

**3.** Үҫеп еткән бөртөклөләрҙең, емеш-йәшелсәнең һ. б. күп күләме, мул йыйымы. *Уңыш йыйыу.* ■ *Келәт тулды ашлыкка...— Кайҙан булды был уңыш? — Бирҙе беҙгә был уңышты кумәк .. тормош!* Ғ. Амантай.

**УҢЫШЛЫ** *с.* **1.** Ыңғай, якшы һөҙөмтәле. *Уңышлы булыу. Уңышлы эш. Уңышлы рәуештә үтәү. // Уңышлы хәл итеү.* ■ *Новиков кайтып инде. Ул уңышлы һунарҙан кайткан кеүек шат, көләс йөҙлө ине.* Д. Юлтый. *Ғәскәр Кариҙелде уңышлы кисеп сыккас, Блюхер Лотфулланың кукрәгенә бронза миҙал каҙай.* И. Ниғмәтуллин.

**2.** Мул уңыш менән характерланған, мул уңыш алына торған. *Быйылгы уңышлы йылдың йәшел бесәне, уңган игендең алтын көлтәләре тейәп ташылган һигеҙ сабаклы бейек эрәндекте .. был арата капка шыгырлап каршы ала, оҙатып кала ине.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Уңышты мул биреүсән. *Уңышлы бойҙай. Уңышлы сейә. Уңышлы сорт.*

**УҢЫШЛЫК** *и. кар.* **уңыш** 1.— *Һин минең эшемә уңышлык, тормошома йәм, күңелемә тыныслык, аҙыгыма тәм бирәһең.* Ш. Шәһәр.

**УҢЫШҺЫҘ** *с.* **1.** Насар һөҙөмтәле. *Уңышһыҙ юл. Уңышһыҙ булыу.* ■ *Яҙ көнө мин тагы ла өйрәнгән каҙак араһына укытырга барҙым. Ләкин был юлы эш уңышһыҙ булды. Урожай ҙа насар булды, каҙактар укыткан өсөн бик аҙ түләне.* Т. Йәнәби. *[Һыуһылыу:] Мине алһаң һин, егет, юлың булыр уңышһыҙ.* «Акбуҙат».

**2.** Иген, емеш, йәшелсә йәки башка кәрәк нәмәне әҙ биргән. *Уңышһыҙ йыл.*

**3.** Уңышты әҙ биреүсән. *Уңышһыҙ орлок. Уңышһыҙ картуф.*

**УҢЫШҺЫҘЛЫК** *и.* Эштәге, тормоштағы насар, кире һөҙөмтәле хәл. *Уңышһыҙлыкка осрау.*

**УҢЫШЫУ** *к. урт. кар.* **уңыу** 2. *Яратып өйләнештеләр ҙә, уңышманылар.*

**УПА** *с. диал.* Көрпәк.

**УПАЙ** [1] *с.* Тупайып торған (күҙгә карата). *Упай күҙ.*

**УПАЙ** [2] *и. диал.* Ашык, бәкәлсәй. *Упай уйыны.*

**УПАЙТЫУ** *к.* Тупайтып асыу (күҙҙе). *Күҙҙе упайтыу.*

**УПАЙЫУ** *к.* **1.** Тупайып асылыу (күҙгә карата). *[Катын:] Йүнһеҙҙәр, күҙҙәре упайып, үҙҙәре генә эсеп ултыра.* Й. Солтанов.

**2.** Күҙҙе ҙур, мәғәнәһеҙ итеп асып текләү. *Упайып ултырыу. Упайып карап тороу.*

**УПАКАЙ** *и. диал.* Томбойок.

**УПАНЛАУ** *к.* Аптырап, куркып, алан-йолан карау. *Упанлап ултырыу.*

**УПКЫН** *и.* **1.** Убып, тартып ала торған баткыл урын. *Төпһөҙ упкын. Упкынлы һаҙ.* ■ *Упкындан сыгырга тырышып, тагы тыпырсынып карагайным, таянысымды югалтып, элеккегә караганда ла шәберәк аҫка төшә башланым.* З. Хисмәтуллин./ Һыуҙың һөйрәп алып батыра торған тәрән урыны. *Диңгеҙ упкыны.* ■ *Бер көслө тулкын килә лә иркене менән йыуып, диңгеҙ упкынына алып китә.* Д. Юлтый.

**2.** Текә ярлы бик тәрән сокор. *Тау юлының бик хәүефле урындары, аҫта баш әйләнерлек тәрән упкындары бар ине.* Р. Низамов. *Каяларҙың килеп, ситенә баҫып, упкындарга асыу ташланым.* Ғ. Амантай.

**3.** *кусм.* Ҙур бәләгә килтерерлек яман хәл. *[Хажигәлә:] Мине ошо кот оскос һәләкәт упкынынан тартып алырга тейешһегеҙ.* М. Тажи.

**УПЛЫҒЫУ** (уплык*ғ*) *к. диал.* Алкыныу.

◆ **Йөрәк уплығыу** күңел болғаныу.

**УПРАВА** [*рус.*] *и.* Революцияға тиклемге Россияла берәй төрлө йәмәғәт, сословиелар йәки

административ эштәргә етәкселек иткән ҡайһы бер учреждениелар атамаһы. *Ҡала управаһы.*

**УПРАВЛЯЮЩИЙ** [*рус.*] *и.* Бер төрлө хужалыҡ йәки дәүләт ойошмаһының башлығы; етәксеһе. *Совхоз бүлексәһенең управляющийы. Трест управляющийы.*/ Помещиктар һәм буржуазия тормошонда помещиктың, сауҙагәрҙең һ. б. хужалығына йәки берәй махсус өлөшөнә идара иткән кеше. *Кузьмин баяр үҙе шикелле үк йыуан управляющийы менән әллә ниҙәр тураһында һөйләшә.* Һ. Дәүләтшина. *Дашковтың имениеһы менән идара итеүсе йәнә бер управляющий бар ине.* Ж. Кейекбаев.

**УП-ТУП** *с. диал.* Башбаштаҡ. *Уп-туп булыу.*

**УПЫЙ** *и. диал.* Ат тояғының боҙолоп, йәйелеп китә торған сире (еүештә торғандан була).

**УПЫРЫМ** *с. диал.* Киң күңелле. *Упырым кеше.*

**УР** [1] *и.* **1.** Тәрән итеп ҡаҙылған тар, оҙон соҡор. *Ур ҡаҙыу.*

**2.** Тупрағын алдына өйөп, тәрән, тар итеп ҡаҙыған хәрби ныҡытма. *Урам һайын төрлө ерҙәрҙә урҙар, блиндаждар ҡаҙыла.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ. *Һаҡлайҙыр зарарҙан ҡалаты ур.* М. Ғафури.

**УР** [2] *и. диал. ҡар.* **уғры** 1.

□ **Ур итеү** урлау.

● *Уланлы ерҙә ур ятмаҫ.* Әйтем.

**УРА** *ымл.* **1.** Һөжүмгә ташланғанда ҡысҡыра торған оран. *Ҡапыл ура тауыштары күтәрелде. Һалдаттар тороп йүгерә башланы.* Д. Юлтый. *Партизандар ура ҡысҡырып, .. улар [бандиттар өҫтөнә] ташлан[ды].* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Берәй нәмәгә шатланғанды, һоҡланғанды белдергәндә әйтелә. *[Малайҙар] икеһе бер юлы ҡысҡырып ебәрҙе: — Ура! Яңылар килгән! Нишләп тораһығыҙ, әйҙәгеҙ, тиҙерәк директор агайға!* Б. Бикбай.

**УРАҒЫТ** *и. иҫк.* Ҡатын-ҡыҙ. *Кис ултырып шулай урағыттар эш эшләүҙән бер ҙә екһенмәй.* Т. Йәнәби.

**УРАҘ** *и. иҫк.* Бәхет, ырыҫ.

♦ **Ураҙ уты** *диал. ҡар.* **аҡбаш** [1].

**УРАҘА** [*фарс.*] *и.* Мосолмандарҙың рамаҙан айында ай буйына иртә таңдан ҡояш байығанса ашамай-эсмәй тороу йолаһы. *Ураҙа ваҡыты. Ураҙа гәйете.* **Нәҙер ураҙаһы** нәҙер әйтеп тотҡан ураҙа. **Нәфел ураҙаһы** өҫтәмә ураҙа. **Ураҙа тотоу** 1) рамаҙан айында ай буйына иртә таңдан ҡояш байығанса ашамай-эсмәй тороу йолаһын һаҡлау; 2) ас булыу. *Ашы юҡ ураҙа тота.*

**УРАҘЛЫ** *с. иҫк.* Бәхетле, ырыҫлы.

● *Ураҙлының балаһы ун бишендә башмын тир.* Әйтем.

**УРАЙ** *и.* Түбәләге сәстең йәки малдың маңлайындағы йөндөң өйрөлөп үҫкән ере. *Ҡаһым түрә менгән кир юрғаның маңлайында булыр урайы* (Халыҡ йырынан).

**УРАҠ** *и.* **1.** Ҡул менән иген, үлән ура торған ваҡ тешле кәкре ҡорал. *Урак теше. Урак һабы. Урак менән урыу.* ■ *Ҡатындар .. урак тарын яурынға һалып, тарының уңғанлығына хайран ҡалып ҡарап торҙо.* Ж. Кейекбаев. *[Тәнзилә әбей — Сәғиҙәгә:] Балаҡайым, беүк ураҡҡа тотонма, йә яҙатайым бармағыңды ҡыркып ебәрерһең. Көлтә бауы ишеп кенә йөрөһәң дә ярар.* М. Тажи.

**2.** Иген урыу эше. *Ураҡҡа төшөү. Ураҡ урыу.* ■ *[Иркәбай:] Ауылда хәҙер халыҡ арыш урағын бөтөрөп, көлтә ташый башланы.* А. Таһиров. *Ураҡ бөтөп, эштәр һил булғас, ҡаҙ өмәләре осорондараҡ ҡыҙ туйлау ни атай бабайҙан ҡалған йола.* Ғ. Вәлиев.

♦ **Ураҡ өҫтө** ашлыҡ урған ваҡыт. *Ураҡ өҫтө еттеме, әлеге ямғыр яфалай башлай, .. ҡара болоттар һағалап ҡына йөрөй.* Р. Низамов.

**УРАҠСЫ** *и.* Ураҡ урған кеше. *Айбулат менән Гөлйөҙөм икәүһе лә бик шәп ураҡсы. Улар урак урған саҡта ҡулдары ҡулға теймәй.* Һ. Дәүләтшина.

**УРАЛАНЫУ** *к.* Ситкә китмәй, эргәлә уралыу. *Ураланып йөрөү.* ■ *[Ғариф:] Был кешегә минең йорт янында ураланырға нимә тарыған? Нимәһен юғалтҡан? Кемде эҙләй?* Ғ. Хәйри. *Көсөктө сакырып алып, уға икмәк ырғытҡайны, .. Зәбирәнең аяғына ураланып, иркәләнә башланы.* Ф. Иҫәнғолов. *Бәләкәй сағымда өлкәндәр янында ураланырға ярата инем. Улар ниҙер эшләй — мин үҙемсә ярҙамлашҡан булам.* Ә. Әхмәткужина.

**УРАЛДЫРЫУ** *к.* **1.** Тирәләй урағып, нимәләр сырмалтыу, солғандырыу. *Алыҫтан саңдарын ҡуккә уралдырып, .. көймәгә пар ат еккән, йән-фарман килгән берәү күренде.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**2.** Эргәлә әйләнгеләргә мөмкинлек биреү, уралырға юл ҡуйыу. *Эргәлә уралдырыу.*

**УРАЛТЫУ** *к.* **1.** Дуңгәләк-дуңгәләк итеп бөгәрләү. *Бына юғарыға табан оҙонсаланып, аҡҡош муйынына барып тоташҡан йомроҡ ҡорһағына ҡойроҡто уралта терән, туҙбаш йылан күршәктән һыу эсергә ынтылған.* З. Биишева.

**2.** Тирә яҡтан әйләндереү, тирәләй солғау; уралтыу. *Даһыр-доһор аҡты болот Ҡаратауҙы уралтып.* Ғ. Дәүләтов.

**3.** *ҡар.* **уратыу** 4.

**УРАЛЫУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **урау** [1] 1, 2. *Сеңрәккә уралған нәмә. Сүрегә уралған еп.*

**2.** Дуңгәләк-дуңгәләк булып бөгәрләнеү. *Шул күлдә бер аждаһа бар, ти. Егегә уралып ята, ти* (Әкиәттән).

**3.** Төрлө-төрлө яҡҡа боролоу; бормаланыу. *Уралып-уралып аға Уралдағы йылғалар* (Халыҡ йырынан).

**4.** Тирәләй урагып, нимәгәләр сырмалыу, солғаныу. *Ут төтөндәре ерҙе яғалап күсә-күсә, күк болотҡа әйләнеп, ағасҡа уралған.* Т. Хәйбуллин.

**5.** Ҡырға китмәй, яҡында әйләнгеләү; ураланыу. *Аяҡ аҫтында уралыу.* ■ *Заман радист бит. Гел шул клуб тирәһендә урала.* Ә. Вәли. *Кәзә көндөҙөн ишек алдында урала, кисен фермаға китә.* С. Кулибай.

**6.** *күсм.* Оҙаҡ ҡына иҫтән, баштан сыҡмай тороу (уй, һүҙ һ. б. ҡарата). *Егет .. күптән теле осонда уралған һүҙҙе ысҡындырҙы.* Я. Хамматов. *Яҙап көтмәһәм дә башымда шул һорау уралды.* Х. Ғиләжев.

● *Арҡандағы ат ҡаҙығына уралыр.* Мәҡәл.

**УРАЛЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **уралыу** 4, 5. *Аяҡ аҫтында уралышыу.* ■ *Шүркә тауы .. түбәһендә һәр ваҡыт өйкөм-өйкөм болоттар уралышып йөрөй.* М. Тажи.

**УРАМ** *и.* **1.** Кеше йәшәгән урында үтеп йөрөү өсөн ике буй булып теҙелеп ултырған өйҙәр араһы һәм уртаһынан шундай юл үткән йәнәшә өйҙәрҙең ике рәте. *Арҡы урам. Оло урам. Ҡала урамы. Урам буйы. Урам осо. Урам саты. Урамға сығыу.* ■ *Мин урамдан барам. Урамда ни тиклем кеше! Артҡа ла үтәләр, алға ла үтәләр.* С. Агиш. *Сәғиҙә урам буйлап китеп бара ине, мәктәптә шаҡ-шоҡ тауыш ишеткәс, унда инеп сығырға булды.* М. Тажи.

**2.** *диал.* Ишек алды.

⧫ **Урам тапау** *ҡар.* **тапау** [1].

**УРАМА** *и.* **1.** *эл.* Электр машинаһында, трансформаторҙа һ.б. ток үтен, магнит майҙаны барлыҡҡа килтерә торған сымдар системаһы. *Ротор урамаһы.*

**2.** *диал. ҡар.* **таҫтар** 1.

**УРАМАЛ** [*фарс.*] *и. диал.* **1.** Яулыҡ. *Баштарына йыйнаҡ итеп күк урамал ураған киленсәктәр һөт бешерә, эремсек ҡайната.* А. Таһиров.

**2.** Таҫтамал.

**УРАН** [1] [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Радиоактив химик элемент, йылтыр аҡ металл. *Уран рудаһы.*

**УРАН** [2] *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**УРАН** [3] [*рус.* ⟨ *лат.*] (*баш хәреф менән*) *астр.* Ҡояш системаһында Ҡояштан иҫәпләгәндә етенсе торған планета.

**УРАНҒЫЛАУ** *ҡ.* Бер тирәнән китмәй, уралыу. *Магазин тирәһендә уранғылау.*

**УРАНҒЫУ** *ҡ. диал.* Уранғылау.

**УРАНДЫРЫУ** *ҡ.* Уранырға булышлыҡ итеү. *Баланы урандырыу.*

**УРАНЫУ** *ҡ.* Үҙ-үҙеңде ҡымтып урау; төрөнөү. *Юрғанға ураныу. Уранып ятыу.* ■ *Уяндым да, һалҡын елдән ҡасып, иҫке халатыма урандым.* Б. Ишемғол.

**УРАҢЛАУ** *ҡ. диал.* Уранғылау.

**УРАТА** *и.* Ниҙәлер әйләндереп алған шартлы һыҙыҡ; әйләнә. *Өйҙөң уратаһы. Ҡаланың уратаһы ҡырҡ саҡырым.* / Әйләндереп, уратып алған тирә-яҡ; әйләнә-тирә. *Ауылдың уратаһы урман.*

⧫ **Географик урата** кешелек йәмғиәтен солғаған тәбиғәт. **Йыл уратаһы** бөтә йыл буйы; йыл әйләнәһе.

**УРАТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **уратыу.** *Таш ҡоймалар менән уратылған нығытмала ул хан йәшәгән.* Б. Вәлит.

**УРАТЫМ** *и.* Сапҡанда, урғанда уратып алынған бер өлөш. *Бер уратым сабыу. Уратымды бөтөрөп туҡтау.*

**УРАТЫУ** *ҡ.* **1.** Тирә-яҡтан әйләндереү, тирәләй солғау. *Уратып бәйләү. Өйҙө кәртә менән уратыу.* ■ *Беҙ, эскерһеҙ дуҫтар, уратканбыҙ аш-һыу, шарап тулы өҫтәлде.* Ш. Галин.

**2.** Ҡамауға алыу; ҡамау. *[Дружинник:] Кәжән заводына барырлыҡ түгел. Уны казактар уратҡан.* Я. Хамматов.

**3.** Өҫтөнә бармай, ситтән әйләнеү; урау. *Юл был ташты уратып үтә икән* (Әкиәттән).

**4.** *ҡусм.* Төп әйтә торғанды икенсе бер нәмәнән башлау. *Уратып һөйләү. Уратып яуап биреү.* ■ *Биктимер улының [атаһының] эргәһенә барып ятты ла, ситтән генә уратып, һүҙ башланы.* Ф. Иҫәнғолов.

**УРАУ** [1] *ҡ.* **1.** Ниҙәндер өҫтөнән йәки тирәләй әйләндереп, ҡат-ҡат тартып йөрөтөү; сырмау. *Епте урау. Урап тотоу.* ■ *Обмоткаларҙы яңынан һәйбәтләп ураныҡ.* Д. Юлтый. *[Толпар:] Өс ҡылымдың береһен балдаҡ кеүек итеп, бармағыңа урап ал* (Әкиәттән). / Тирәләй йөрөтөп, ҡаплау. *Башҡа шәл урау. Муйынға шарф урау.*

**2.** Тирәләй әйләндереп, тотош көпләү; төрөү. *Баланы юрғанға урау.* ■ *Һыуһылыу Заятүләкте . ебәк һымаҡ йомшаҡ толомо менән урай ҙа Асылыкүл төбөнә алып төшөп китә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**3.** Тирәләй әйләнеп йөрөү. *Урап сығыу. Урап барыу.* ■ *Ғәрифулла тар ишек алдынан бер урап килде.* С. Агиш. *Боғаҙаҡай күлде өс ураным* (Халыҡ йырынан).

**4.** Тотош ҡыҙырыу, йөрөп әйләнеү. *Башҡортостан ерҙәрен беҙ йөрөргә булдыҡ урап.* Р. Ниғмәти.

**5.** Барып, кире әйләнеү. *Урап килеү. Урап ҡайтыу.* ■ *Хәмит менән Таһир бөгөн дә иртүк вокзалға юл тотто. Олаталары ҡапҡа төбөндә: «Төшкә урарға тырышығыҙ»,— тип оҙатып ҡалды.* Р. Ғабдрахманов.

**6.** Тураға тартмай, ҡайҙандыр ҡырҙан, ситтән әйләнеү. *Шишмә башынан урап сығыу. Күперҙән урау.* ■ *Төлкә кешенең еҫен әллә ҡайҙан уҡ һиҙеп килә лә ҡапҡанды урап китә лә бара.* М. Тажи. *Ике ҡаланы бер бейек тау бүлеп тора, ти. Ике ҡала кешеләре бер-береһенә әллә ни тиклем ер урап йөрөй, ти* (Әкиәттән).

**7.** *ҡар.* **уратыу** 1. *Ҡойма менән урау.*

⧫ **Тел урау** *диал.* тел әйләнеү (*ҡар.* **тел**). **Ураған һайын** *ҡар.* **һайын.**

**УРАУ** [2] *с.* Тураға тартмай, ҡырҙан, алыҫтан әйләнеп йөрөмәле. *Урау юл.* ■ *[Сөнәғәт:] Ҡыҙыл Мәсет яҡлап ҡайтҡайныҡ та, унан бик урау. Бынан тураға .. сыға торған юл бар, тинеләр.* Ж. Кейекбаев.

● *Урау булһа ла юл яҡшы, һуҡыр булһа ла ҡыҙ яҡшы.* Әйтем.

**УРАУ** [3]: **һүҙ урауы** ниҙер хаҡында туранан-тура булмаған оҙаҡ һүҙ ағышы, оҙаҡ һүҙ барышы. *Улар .. оҙаҡ һөйләште. Истебай һүҙ урауында Күсәрбайҙан отрядтың ҡайҙан килеп, ҡайҙа барғанын — барын төпсөп һораша барҙы.* Һ. Дәүләтшина.

● *Һүҙ урауы белмәгән үҙенә һүҙ килтерер.* Әйтем.

**УРАУЛЫ** *с.* Урап ҡуйыулы. *[Биктимер:] Уң итегемдең табанында аҡ кульяулыҡҡа урауды ҡыҙыл һаплы бәке булыр* (Әкиәттән).

**УРАУЫС** [1] *и.* Нимәгә булһа ла урай торған нәмә. *Билал .. балтырындағы һары буҫтау урауыстарына ҡарап ҡуйҙы.* А. Таһиров.

**УРАУЫС** [2] *и. диал. ҡар.* **борғоса** 1.

**УРҒУЯН** *и.* Ҡалҡыуыраҡ ерҙә йөрөй торған һырт буйы һорғолт эре ҡуян.

**УРҒЫЛ** *с.* Ваҡ-ваҡ ҡалҡыулығы булған, соҡор-саҡырлы. *Урғыл ер.* ■ *Төйәләҫкәй буйы*

*ургыл-ургыл, ургуяндар ятмаç ер түгел* (Халыҡ йырынан).

**УРҒЫЛДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Эстән, төптән көс менән атлыҡтырыу; урғытыу, урғылтыу. *Ургылдырып диңгеҙ тулҡындарын үтеп китте ҡойон көньяҡлап.* М. Басыров.

**2.** *күсм.* Көслө итеп барлыҡҡа килтереү; урғылтыу. *Йөрәктән моң ургылдырыу.*

**УРҒЫЛЙЫН** *и.* Урғыл-урғыл соҡорло тигеҙһеҙ ер. *Юлдағы ургылйын.*

**УРҒЫЛЙЫТЫУ** *ҡ.* Ныҡ урғылтыу. *[Һомай] соҡорҙо һыуҙан баçтырған, ургылйыҡан, таштырған да Зәркумды һыуҙа йөҙҙөргән.* «Урал батыр».

**УРҒЫЛЙЫУ** *ҡ.* Ныҡ урғылыу. *Һыу ургылйып аға.*

**УРҒЫЛТЫУ** *ҡ.* **1.** Эстән, төптән көс менән атлыҡтырыу; урғылдырыу, урғытыу. *Һыуҙы ургылтып ҡайнатыу.*

**2.** *күсм.* Көслө итеп барлыҡҡа килтереү; урғылдырыу. *Моң ургылтыу. Шатлыҡ ургылтыу.*

**УРҒЫЛЪЯН** *и. ҡар.* **урғылйын.**

**УРҒЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** Эстән, төптән көс менән атлығыу. *Ургылып ағыу. Ургылып ҡайнау.* ■ *Ҡая аçтындағы тәрән соҡорҙан ургылып шишмә сыға.* Ә. Вахитов.

**2.** *күсм.* Көслө булып ғәмәлләшеү. *Күңел төбөнән ургылып сыҡҡан моң ине был.* Н. Мусин.

**УРҒЫС** *и.* Иген ура торған машина. *Киң алымлы ургыс. Лафетлы ургыс.* ■ *Ураҡ ваҡыты етте, ургыстар эшләп китте.* З. Биишева.

**УРҒЫТЫУ** *ҡ.* Эстән, төптән көс менән атлыҡтырыу; урғылдырыу, урғылтыу. *Вулкандар утлы магма ургытып, яңынан хәрәкәт итә башлай.* Д. Бураҡаев.

**УРҒЫУ** *ҡ.* **1.** Эстән, төптән көс менән бәреү; атылыу. *Ургып ҡайнау.* ■ *Тағы ургыр нефть фонтаны.* Я. Ҡолмой.

**2.** *күсм.* Көслө булып ғәмәлләшеү; урғылыу. *Донъяның һәр яғында ла шат йырҙар ургып торһон.* А. Игебаев.

**УРҘА**[1] *и.* **1.** Нәмә элеү өсөн түбә таҡтаһы аçтына стена буйлатып аçҡан таяҡ. *Сәкинә .. шәлен урҙаға элде, ҡыйыу атлап, түрбаш яҡҡа үтте.* Н. Мусин.

**2.** *диал.* Өрлөк.

**3.** *диал. ҡар.* **һайғау**[2].

**УРҘА**[2] *и. тар.* **1.** Ғәскәре менән хан торған урын. *Урҙаға ингәс, Мәсем хан түй ҡыла, ти, батырҙарға бик өлкән һый ҡыла, ти.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**2.** Бер хан ҡул аçтындағы дәүләт. *Бөтә башҡорт Мөйтәнгә урҙа булды.* «Мөйтән бей».

● **Урҙалы йылан** өйкөлөшөп ятҡан күмәк йылан.

**УРҘЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **урыу.** *Иген урҙырыу.*

**УРЛАН** *и. диал.* Сыпҡай өйрәк (*ҡар.* **өйрәк** 1).

**УРЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **урлау.** *Урланган бәхет. Урланган нәмә.*

**УРЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** *йөкм. ҡар.* **урлау.**

**2.** Һиҙмәй ҡалып, кемдәндер берәй нәмәңде алдырыу. *«Мәңге һыуҙы» — божраны ник хоҙай Иблистән урлатҡан уны? Ник уны башта уҡ йәшереп ҡуймаған? Ник мәләктәр урлағанды тоймаған?* Ш. Бабич.

● *Атын урлатҡас, ҡәртәһен ныгытҡан.* Әйтем.

**УРЛАУ** *ҡ.* **1.** Кешенекен йәшереп үҙләштереү. *Ат урлау. Урлап алыу. Урлап байыу. Урлап тотолоу.* ■ *Бер мәлде уйнап туйҙыҡ та Солтан тигән кешенең баҡсаһынан ҡыяр урлай барырға булдыҡ.* Т. Йәнәби. *Үгәй ҡулы аçтында үкһеҙ йәтим бала йырлаган, өç-кейемгә, тамаҡ ашҡа туймай, май, һөт, короттар ҙа урлаган.* Б. Вәлит. / Йәшереп алып ҡасыу. *Ҡыҙ урлау.* ■ *Ҡарағаш исемле был ҡыҙҙы күптән түгел генә дейеү урлап алып килеп, үҙенә ҡол иткән икән, ти* (Әкиәттән). / Йәшерен рәүештә белеү. *Сер урлау. Һүҙ урлау.*

**2.** *күсм.* Юҡ итеү, бөтөрөү. *Бәхетте урлау. Шатлыҡты урлау.* ■ *Минең өçтән үткән ауыр йылдар минең йәшлегемде урланы.* Ғ. Хәйри.

● *Илдекен урлаған ҡазаға ҡалған.* Мәҡәл.

**УРЛАШЫУ** *ҡ.* Уғрылыҡ менән шөғөлләнеү. *Фәхриҙең, үҙе былай урлашыуын урлашмаһа ла, ниндәйҙер шикле кешеләр менән бәйләнеш тотоуын Яҡуп күптән һиҙенеп килә.* Б. Бикбай.

**УРЛЫҠ** *и. ҡар.* **уғрылыҡ.**

● *Урлыҡтың һуңы хурлыҡ.* Әйтем.

**УРМАЙЫУ** *ҡ. диал.* Өңрәйеү.

**УРМАН** *и.* Күп ер биләгән ағаслыҡ. *Йәш урман. Ҡуйы урман. Оло урман. Ылыçлы урман. Урман ауыҙы. Урман эсе. Урман буйы. Урман ҡырҡыу. Урман хужалығы.* ■ *Урман араһына индем, юғары ҡараным. Һирәк ботаҡлы ҡарағайҙар төҙ, юғары күтәрелеп үçкән.* Д. Юлтый.

**Урман ҡараусы** урманды һаҡлау эшендәге вазифалы кеше; урмансы.

**УРМАНЛЫҠ** *и.* Урманлы урын. *[Ауылдың] тирә-яғы йырып сыҡҡыһыҙ шыр урманлыҡ.* Б. Бикбай. *Пароходтар Иҙел буйлап бара, бөҙрә тулҡындарҙа тирбәлеп. Яңғырап ҡала йәшел урманлыҡтар, болон һәм дә ярҙар тирәһе.* Ғ. Сәләм.

**УРМАНСЫ** *и.* Урманды һаҡлау эшендәге вазифалы кеше; урман ҡараусы. *Урманға ысын мәғәнәһендә ғашиҡ булған кешеләр бар был донъяла. Исемдәре лә урмансы. Уларҙың һәр көнө урманда үтә.* Н. Мусин.

**УРМАНСЫЛАУ** *ҡ.* Урман гиҙеү. *Урмансылап йөрөү.*

**УРМАНСЫЛЫҠ** *и.* Үçемлек үрсетеү эшенең урман үçтереү менән шөғөлләнгән тармағы. *Урмансылыҡ белгесе. Урмансылыҡ идараһы. Урмансылыҡ хужалығы.*

**У́РНА** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Яндырған мәйеттең көлөн һаҡлай торған һауыт.

**2.** Һайлау бюллетенен төшөрә торған йәшник. *Һайлау урнаһы.*

**3.** Урамдарҙағы, йәмәғәт урындарындағы сүп һауыты.

**УРОЖА́Й** [*рус.*] *и. ҡар.* **уңыш** 2, 3.

**УРО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Урология буйынса врач, белгес.

**УРОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Медицинаның бәүел ағзаларының һәм ир-аттың енси ағзаларының сирен өйрәнә торған тармағы. *Урология кабинеты.*

**УРТ** *и.* Ауыҙ ҡыуыщлығының теш һәм бит ите араһындағы өлөшө. *Урт ите. Урт шешеү. Уртты сәйнәү.* ■ *Миңнулла ике уртын тумпайтып, күҙен ҡыҫып күрһәтте.* Ф. Исәнғолов.

**УРТА** *и.* **1.** Нимәнең дә булһа ситтәренән, ҡырҙарынан, остарынан ҡаршы яҡтарына ҡарата бер тигеҙерәк алыҫлыҡта булған урын. *Иҙән уртаһы. Аҡлан уртаһы. Майҙан уртаһы.* // *Урта бүлмә. Урта ишек. Урта урам.* ■ *Табын уртаһына бер нисә урынға киндерҙән һуғылған ашъяулыҡтар йәйелде.* Т. Хәйбуллин. *Урта тоштараҡ кемдер нәҙек тауыш менән йыр башланы.* Я. Хамматов.

**2.** Ваҡыт араһының башы менән аҙағынан бер тигеҙерәк алыҫлыҡтағы мәл. *Йәй уртаһы.* ■ *Йәсиг уҙған, төн уртаһы яҡынлашҡан, тирә-яҡты ҡараңғылыҡ баҫҡан.* Ш. Бабич. / Нимәнең дә булһа үҫешендә, барышында башы менән аҙағы араһындағы мәл. *Уйын уртаһында ҡайтып китеү. Һүҙ уртаһында туҡтап ҡалыу.*

**3.** Бер мөхит йәки күмәк төркөмдөң эсе; ара. *Уртаға алыу. Уртаға сығыу.* ■ *Ҡотлобай .. егерме-утыҙлап һыбай уртаһында пар ат еккән ҡырандаҫҡа ултырып, ауылдан йән-фарман сабып сыҡты.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Бер эш-шөғөл, хәл-ваҡиғаның һ. б. эсе, үҙәге. *Табындың уртаһында булыу. Кәңәштең уртаһында булыу.* ■ *Мөлөк ағай ҡайғы уртаһында ҡалды. Берҙән, ер һыҙып үкергән тауыштың ни икәнен белә алманы, икенсенән, берҙән-бер аты Турысай өркөп, юҡ булды.* Т. Хәйбуллин. **Уртаға ҡуйыу** күмәк кеше ҡарамағына ҡуйыу.

**5.** Ике кеше йәки нәмәнең аралығы. *Мин уларҙың [Байгужа менән Буранбайҙың] урталарына яттым.* Д. Юлтый. *Ҡыҙ ике уртаға инеп баҫҡан* (Әкиәттән).

**6.** *с. мәғ.* Сифаты, үҙенсәлеге яғынан ҡапма-ҡаршы ике дәүмәл араһында (ҙур менән бәләкәй, бейек менән тәпәш, ауыр менән еңел һ. б.) торған. *Урта буйлы. Урта көрлөк. Урта йәштәге кеше. Урта матур.* ■ *Үтә байҙар бал эсә, урта байҙар буҙа эсә* (Халыҡ йырынан).

**7.** 3-сө зат у.-в. клш ялғауы менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*ҡар.* **уртаһында**).

♦ **Ир уртаһы** ир-ат ғүмерендә ҡырҡ менән илле араһындағы дәүер. *Ир уртаһына етеү.* **Урта бармаҡ** һуҡ менән сығанаҡ араһында урынлашҡан бармаҡ. **Урта белем** ун йыллыҡ мәктәптә, урта махсус уҡыу йортонда йәки профессиональ-техник училищела алған белем. **Урта быуаттар** бөтә донъя тарихында боронғо донъя тарихынан һуң яңы тарихҡа тиклемге дәүер (5 быуат аҙағы — 17 быуат уртаһы). **Урта ҡул** *ҡар.* **ҡул** [1].

**УРТАҒА** *р.* Тигеҙ ике өлөшкә; урталай. *Уртаға бүлеү. Уртаға бөкләү. Уртаға ярыу.*

**УРТАҒЫНА** *р. ҡар.* **уртаҡҡа.**

**УРТАҠ** [1] *с.* **1.** Икәү йәки күмәк өсөн дөйөм. *Уртаҡ мәсьәлә. Уртаҡ шатлыҡ.* ■ *Сабыр итегеҙ инде, ил менән бергә булған уртаҡ ҡайғы бит.* И. Көҫәпҡол.

**2.** Ике йәки күмәк кеше ҡарамағындағы. *Уртаҡ хужалыҡ. Уртаҡ мал.* // *Уртаҡ тотоноу. Уртаҡ эшләү.*

♦ **Кем менән уртаҡ** юҡ тигән нәмәне булдырыу сараһы барлығын күрһәткәндә әйтелә. *[Тимер:] Мин, малай кеше, урын табырмын. Иҙән кем менән уртаҡ?* Б. Бикбай. **Уртаҡ тел табыу** *ҡар.* **тел.**

● *Сибәрҙең йөҙө уртаҡ, оҫтаның ҡулы уртаҡ.* Әйтем.

**УРТАҠ** [2] *и. иҫк.* **1.** Ҡыҙҙың үҙ ата-әсәһе менән морондоҡ ата-әсәһенең бер-береһенә өндәшеүһүҙе.

**2.** *ҡар.* **иптәш.**

**УРТАҠҠА** *р.* Бергәләп файҙаланыу, ҡулланыу шарты менән. *Уртаҡҡа алыу. Уртаҡҡа эшләү.*

**УРТАҠЛАУ** *к.* Уртаҡ (2 мәғ.) итеп бүлеү, үҙ-ҙара бүлешеү. *Уртаҡлап мал һуйыу.* ■ *Арғымаҡтың данын, хурлығын да уртаҡлай бит һыбай ир-егет!* М. Илбаев.

**УРТАҠЛАШЫУ** *к.* **1.** Икәү-ара уртаҡ бүлешеү. *Ҡотлоярҙың байыуын халыҡ былай һөйләй: «Ул баяр яланында бик күп хазина тапҡан икән дә баяр менән уртаҡлашҡан икән», ти.* Д. Юлтый. / *күсм.* Кемдеңдер ҡайғы, хәсрәтен, кисерещ, тойғоһон яҡын алып бүлешеү. *Кешенең ҡайғыһын уртаҡлашыу.* ■ *Дуҫтарҙың табынында булыу, ҡыуанысын уртаҡлашыу үҙе эш түгелме ни?* Б. Бикбай.

**2.** Белгән, күргәнеңде бүтәндәр менән бүлешеү. *Тәжрибә уртаҡлашыу.* ■ *[Айбулат менән Зөфәр] үҙ белгәндәрен уртаҡлашырға, халыҡ араһында таратырға ашыҡты.* Һ. Дәүләтшина. / *күсм.* Кисереш, тойғоңдо, уй, фекереңде бүтәндәр менән бүлешеү. *Ҡайғыны кеше менән уртаҡлашыу.* ■ *Гөлнур ҡайтып керҙе. Ул өҫ-башын һалыр-һалмаҫтан минең менән шатлығын уртаҡлашырға тотондо.* М. Тажи.

**УРТАҠЛЫҠ** *и.* Уртаҡ яҡ, оҡшаш яҡ; дөйөмлөк. *Юҡ, холоҡ ҡына түгел, уларҙың [Татлыбай менән Ҡадирҙың] төҫтәрендә лә ниндәйҙер уртаҡлыҡ бар кеүек.* Б. Бикбай.

♦ **Уртаҡлыҡ исем** *грам.* бер төрлө нәмәләрҙең һәм төшөнсәләрҙең дөйөмләштерелгән исеме, мәҫәлән: ағай, ил, йылға. **Уртаҡлыҡ йүнәлеше** *грам.* бер үк эш-хәрәкәттең ике йәки бер нисә субъект ҡатнашы менән башҡарылыуын белдергән ҡылым категорияһы.

**УРТАЛАҒЫ** *с.* **1.** Нимәнең дә булһа ситтәренән, ҡырҙарынан, остарынан ҡаршы яҡтарына ҡарата бер тигеҙерәк алыҫлыҡтағы урында булған. *Гөлйөҙөм Тимерғәле ҡарттан оялып, тороп китте. Урталағы ҡыҙыл шаршауҙы төшөрөп, мейес артына сыҡты.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ике һәм унан күберәк кеше йәки нәмәнең урта ерендә булған. *[Фәхри] ҡайыш дилбегә менән урталағы аттың һыртына йомшаҡ ҡаҡҡылап алды.* Б. Бикбай. *Урталағы кеше ҡап әсенән минең .. ҡәләмде сығарҙы.* С. Агиш.

**УРТАЛАЙ** *р.* Урта (1 мәғ.) тәңгәлдән, уртанан. *Урталай бүлеү. Урталай ярыу.* ■ *[Йәнтимер] кеҫәһенән урталай бөкләгән ике билет сығарҙы.* С. Агиш.

**УРТАЛАУ** *к.* Яртылаш башҡарыу, яртылаш үтеү. *Юлды урталау.* ■ *Сәйҙе урталағанда кемдер ишек туҡылдатты.* Т. Хәйбуллин.

**УРТАЛАШ** *р. диал.* Яртылаш.

**УРТАЛАШЫУ** *к. һир.* Яртылаш башҡарылыу, яртылаш эшләнеү. *Бесән эше урталашты.*

**УРТАЛЫҠ** *и.* **1.** Урта (1 мәғ.) тәңгәл, урта тош; урта. *Ҡыҙыл флаг урталығы уҡа менән сигелгән* (Халыҡ йырынан).

**2.** Бер мөхит йәки күмәк төркөмдөң эсе; урта, ара. *Урталыҡҡа йәнә берәү сығып, маҡтап йырлаған, ти, Талипты.* Б. Вәлит.

**3.** Эш, шөғөл, хәл-ваҡиғаның үҙәге. *Эштең урталығында булыу.*

**4.** Ике кеше йәки ике нәмәнең аралығы; урта. *Ул ике ҡатындың урталығына ултырып, .. ҡытай сәйен ҡаты итеп яһатып, оҙаҡлап-оҙаҡлап эсте.* Ғ. Дәүләтшин.

**5.** Ҡапма-ҡаршы күренештәрҙә, хәл-ваҡиғаларҙа урталағы ҡараш, позиция. *Тура һүҙле булдыҡ, беҙҙе көткән хәтәр яҙмыштарға ҡарамай. Урталыҡты һаҡлап килеүселәр киҫәттеләр: «Улай ярамай».* Р. Сафин.

**УРТАМ** *и. диал.* Уртлам.

**УРТАНСЫ** *с.* Өс баланан, ағай-эненән, апай-һеңленән һ. б. йәш буйынса икенсе. *Уртансы ағай. Уртансы апай. Уртансы ҡыҙ.* ■ *[Рәшиҙә әбей:] Һин һуң, улым, кем, теге Сәлимәнең оло улы түгелме? — Юҡ, әбей, уртансыһы.* К. Мәргән. *Уларҙың [Урал менән Ҡарағаштың] өс улы булды, ти: өлкәне — Иҙел, уртансыһы — Яйыҡ, кинйәһе — Һаҡмар.* «Урал батыр».

**УРТАСА** *с.* **1.** Үлсәүе, миҡдары һ. б. буйынса урта кимәлдә булған. *Уртаса ауырлыҡтағы боксер. Уртаса ҡалынлыҡтағы таҡта. Уртаса һәм ауыр танктар. Уртаса ҙурлыҡтағы өй.* ■ *Уртаса аҙымдар менән баш юлдан барабыҙ.* Д. Юлтый. *Өсөнсө тирмәләге уртаса хәлле, күберәк Айҙаҡайҙан йыйылған ҡунаҡтар араһына Үмәр картты ла ултырттылар.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Яҡшы ла, насар ҙа түгел, бер ни менән айырылып тормаған, ябай. *Уртаса белем. Уртаса уҡыусы. Уртаса талант.* // *Уртаса кейенеү. Уртаса уҡыу. Уртаса эшләү.* ■ *Өйҙөң һул яғындараҡ уға ҡаршы һалынған уртаса ғына кирбес келәт.* Һ. Дәүләтшина. *Уртасараҡ кейемле .. бер малай бар ине.* С. Агиш.

**3.** Бер нисә дәүмәл суммаһын уларҙың һанына бүлеүҙән килеп сыҡҡан, билдәле бер төркөм күренештәр өсөн ғәҙәти, типик булған. *Айлыҡ уртаса температура. Йыллыҡ уртаса яуым-төшөм. Поездың уртаса тиҙлеге. Бойҙайҙың гектарынан уртаса уңышы.* ■ *— Һәр йөктә уртаса егерме-егерме биш бот булһа, күпме сыға һуң?* М. Тажи.

**УРТАУ** *к. диал.* Уртлау.

**УРТАУЫЛ** *и. иҫк.* Урталыҡтағы төп ғәскәр. *Арттараҡ Арыҫлан батырҙың уртауылы барҙы.* Ғ. Ибраһимов.

**УРТАҺЫНДА** *бәйл. функцияһында* **1.** Төп килештәге исемдән һуң килеп, урта, үҙәк өлөшөндә нимәләр торған, ниҙер башҡарылған берәй нәмәне, урынды, арауыҡты белдергәндә ҡулланыла.— *Йә, еңгәләр, эш барамы? — Талипов иҙән уртаһында баҫып торҙо.* М. Тажи.— *Минең йортом позиция уртаһында ҡалды. Хәҙер минең ғаиләм дә юҡ. Үҙем генә.* Д. Юлтый.

**2.** Төп килештәге исемдән һуң килеп, эш-хәрәкәт, хәл-ваҡиғаның билдәле бер ваҡыт аралығында башҡарылыуын, үтәлеүен белдереү өсөн ҡулланыла. *Аҙна уртаһында китеү.* ■ *Ҡайһы бер саҡтарҙа ул [Фәхри] төн уртаһында торон, ишек алдына сыға ла һауаға ҡарап һунар мылтығынан ата.* Б. Бикбай.

**УРТЛАМ** *и.* Уртҡа бер тултырып алырлыҡ күләм. *Ул [Тимер] .. бер уртлам һыу йотто.* Б. Бикбай.

**УРТЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **уртлау.**

**УРТЛАУ** *к.* Уртҡа тултырып алыу (шыйыҡ нәмәне). *[Шафиҡ] сылтырап аҡҡан һалҡын шишмә һыуын ҡуш усы менән һоҫоп уртланы.* Я. Хамматов.

**УРШ-УРШ** *оҡш.* Йылҡы малының танау аша сығарған тауышын белдергән һүҙ. *Урш-урш итеү. Урш-урш килеү.*

**УРШЫЛДАУ** *к.* Урш-урш итеү, урш-урш килеү. *Йәш бейә колонон кешеләрҙән ҡурсып уршылдай, э инде ситкәрәк китһә, борсолоп бышҡыра.* Й. Мостафин.

**УРЫҠ-ҺУРЫҠ** *р.* Әҙ-әҙләп, әллә ниҙә бер. *Урыҡ-һурыҡ ашау. Урыҡ-һурыҡ эшләү.* ■ *Эш өҫтөндә һиңә уҡыу ҡайҙа, урыҡ-һурыҡ уҡыһаң уҡыйһың.* Ғ. Амантай.

**УРЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **урыу.** *Урылған иген.*

**УРЫН** [1] *и.* **1.** Берәй есем алып торған арауыҡ, шулай уҡ кем, ниҙер алып торорға мөмкин булған буш арауыҡ; ер. *Өҫтәлдә китаптарға урын бушатыу. Сумаҙанда башҡа урын ҡалмаған.* ■ *Зилский торған урынынан ҡуҙғала алмай, ҡобараһы осоп, ҡолап китте.* Ғ. Дәүләтшин. *Болотҡа еткән тауҙарҙы һикереп ашҡан Аҡбуҙат, тояғы тейгән урындан күл сығарған Аҡбуҙат.* «Аҡбуҙат». / Ниҙер яйлашҡан, алып торған йәки булып ятҡан арауыҡ, пункт. *Иҫтәлекле урын. Тарихи урын. Осрашыу урыны. Килен төшәү урыны.* ■ *Һайгисеү тигән урын ауылдан бер саҡырым түбәндә.* Н. Мусин. *Иҙел буйҡай ҙары ай ҡаялыҡ полковник Тәфтиләү яу урыны* (Халыҡ йырынан). / *күсм.* Берәй эш-хәрәкәт, хәл-ваҡиға өсөн булған сәбәп, нигеҙ. *Сыңбулатов ҡыҙарынды, бүртенде. Уға Ямалға ҡаршы һүҙ әйтергә урын ҡалманы.* М. Тажи. *Миңә, минең бәләкәй генә башыма, уйланырға бик ҙур урын бар.* С. Агиш.

**2.** Кем, нимәләр өсөн махсус билдәләнгән, тәғәйенләнгән йәки ғәҙәттә кем, нимәләр алып торған билдәле бер арауыҡ, ер. *Аш урыны. Сәй урыны. Аҫҡыстар үҙ урынында элеүле тора.* ■ *Бурәнбай ҡулдәк-ыштан йыуҙырып ала торған урын тапҡан.* Д. Юлтый. *Уны [Айбикәне] һорап яусы килде... «Урыны яҡшы, улы аҡыллы, тип әйтәләр»,— тип, кейәүгә биреп тә ебәрҙеләр.* Һ. Дәүләтшина. / Берәй төрлө эшмәкәрлек өсөн тәғәйенләнгән, хеҙмәт иткән арауыҡ, ер. *Өй һалына торған урын. Эш урыны.* / Бер кеше өсөн тәғәйенләнеп, ултырыу йәки ятыу, ҡайҙалыр булыу өсөн махсус рәтләнгән бүлмә, арауыҡ (тамаша залында, поезда, гостиницала һ. б.). *Плацкартлы урын. Буш урынға барып ултырыу.* ■ *Театрҙа Йәнтимер менән осрашманым, сөнки урыным юғала ине.* С. Агиш.

**3.** Эштә, тормошта берәй өлкә буйынса тотҡан роль, әһәмиәт. *Күрәштә тотҡан урын.* ■ *Дәүләкән станцияһы .. хәҙер шул төбәктең*

*сауҙа үҙәге урынын тота.* Д. Юлтый. / Берәй төрлө ярыштың һөҙөмтәһе булараҡ кемдең дә булһа башҡалар менән сағыштырғандағы хәле. *Призлы урын. Еңел атлетика буйынса ярышта беренсе урынды алыу.*

**4.** Берәй шөғөл менән булған ер, вазифалы эш. *Етәксе урын. Ҙур урын. Яңы урын алыу. Яуаплы урын. Урынға инеү.* ■ *Зифа урынға инеп эшләү, ике ҡустыһын тәрбиәләү ягын ҡайғыртты.* А. Таһиров. *[Сурагол:] Мин эш эҙләп килдем, начальник. Мөмкин булһа, берәй урынға ҡуйһағыҙ, яҡшы итер инегеҙ.* Т. Хәйбуллин. *Уҡыған, урында ултырған кешеләр элекке герман һуғышында һуғышҡа бармай, аҡ билет алып ҡалды.* Ж. Кейекбаев.

**5.** Ер өҫтөнөң арауығы, участкаһы. *Асыҡ урын. Соҡорло-саҡырлы урын. Таулы урын. Һаҙамыҡ урын.* ■ *Ҡалҡыуыраҡ урынға менгәс, алыҫтан бер ҙур ауыл күренде.* Д. Юлтый. / Яҡ, ер. *Таныш урынға килеп сығыу.*

**6.** Үҙәк һаналған ерҙән ситтә булған өлкә, провинция, периферия, шулай уҡ шундағы ойошма, учреждение. *Урындарҙан килгән делегаттар.* ■ *Съезд ҡарар итә: урындарҙа бөтә власть эшселәр, һалдаттар һәм крәҫтиәндәр депутаттары Советтарына күсә.* Һ. Дәүләтшина. *Әминевтың .. аҙ һүҙҙәренән дә Саҡай үҙе өсөн күп һөҙөмтә сығарҙы; тимәк, урындағы кешеләргә яҡшыраҡ күренә, урында сараһын күрергә кәрәк.* Б. Бикбай.

**7.** Берәй нәмәнең айырым ере, участкаһы. *Ағастың ярылған урыны. Беләктәге укол урыны.* ■ *[Мейестең] сыуал арты тип әйтелә торған урынына сытыр, утын киҫәктәре тултырылған.* Ғ. Дәүләтшин. *[Ҡарт:] Ҡарағайҙың анауы ярылған урынын ҡара әле. Ул солоҡтоң ҡапҡас урыны.* М. Тажи.

**8.** Әҙәби йәки музыкаль әҫәрҙең, берәй текстың һ. б. өлөшө, өҙөгө. *Доклад шул урынға еткәс, .. Әмирханов..: «Бына нисек булған, ә!» — тигән булды.* С. Агиш. *Үҙенә тап төшөрә торған урындарҙы ситләтеп үтеп, барлыҡ күргәндәрен һөйләп сыҡты Гәрәй.* Б. Бикбай.

**9.** Багаждың, йөктөң һәр айырым нәмәһе (төк, йәшник, сумаҙан һ. б.). *Багажға биш урын тапшырыу.*

**10.** Йоҡлау, ятыу өсөн кәрәкле нәмәләр; түшәк, урын-ер. *Урын йыйыу. Урын түшәү. Урын һалыу.* ■ *Ул [Мәгфүрә] яулыҡты тәҫләп бөкләп, урын егенә ҡыҫтырҙы.* Һ. Дәүләтшина. /Йоҡлау өсөн шул нәмәләр түшәлгән ер. *Йылы ғына урында йоҡлағы, оҙаҡ итеп йоҡлағы килә.* Д. Юлтый. *Атаҡайым, инде мин китәм, минең урыныма кем ятыр* (Сеңләүҙән).

**11.** Төбәү клш ялғауы менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*ҡар.* **урынға, урында, урынына**).

♦ **Урын аяғы** урын ҡаралдыһын йыйып, өйөп ҡуя торған ширлек (урындыҡтың башына ултыртыла). **Урын бауы** йыйылған ҡаралдыны тарттырып ҡуя торған суҡлы, биҙәкле яҫы бау. **Урын тотоу** билдәле әһәмиәткә эйә булыу, йоғонто яһау. **Урыны менән** кәрәк саҡта, кәрәк ерҙә. *[Хафиз:] Ҡорбанов ул урыны менән маҡтай ҙа, етешһеҙ яғыңды күҙеңә тура ҡарап әйтә лә белә.* М. Тажи. **Үҙ урынында** тейешле, уңайлы мәлдә, хәлендә. *Һәр нәмә үҙ урынында яҡшы.*

● *Ҡуян бала тапҡан, ҡуйыр урын тапмаған.* Мәҡәл.

**УРЫН** [2] *и.*, **киндер урыны** Киндер һуғыу ҡорамалы.

**УРЫНАШ** *и. һөйл. ҡыҫҡ. ф.* Урын ашы.

**УРЫНБАҪАР** *и.* Етәкселек вазифаһындағы кешенең ярҙамсыһы. *Министр урынбаҫары. Директор урынбаҫары.*

**УРЫН-ВАҠЫТ: урын-ваҡыт килеш** «кемдә», «нимәлә», «ҡайҙа» һорауҙарына яуап биргән килеш.

**УРЫНҒА** *бәйл. функцияһында*-**һы** йәки *-ғр* ялғаулы сифат ҡылым формаһынан һуң килеп, бер эш-хәрәкәт йәки нәмәнең башҡа бер эш-хәрәкәт йәки нәмәне алмаштырғанын белдергәндә ҡулланыла; урында. *Уҡыйһы урынға уйнап йөрөү. Ярҙамлашаһы урынға ҡамасаулау.* ■ *Кәбән ҡойҙораһы урынға [бригадир] уны картуф еренә ебәрә.* М. Тажи.

**УРЫНДА** *бәйл. функцияһында ҡар.* **урынға.** *Тырышаһы урында нишләйҙәр бит, ә? Колхоз малы, колхоз донъяһы тип ҡарайҙар.* Б. Бикбай.

**УРЫНДАҒЫ** *с.* Билдәле бер урынға хас, билдәле бер урынға мөнәсәбәтле. *Урындағы гәҙәт. Урындағы һөйләш. Урындағы шарттар.* ■ *[Сәғиҙә:] Дәресте урындағы материалдарға ҡулайлаштырам.* М. Тажи. / Шул урында йәшәгән. *Урындағы халыҡ.* ■ *«Белмәйем, уныһын инде һеҙ, урындағы кешеләр үҙегеҙ ҡарағыҙ, һеҙгә яҡыныраҡ»,— тине Сафа Әминев,— беҙгә ҡараңғы.* Б. Бикбай. / Билдәле бер урын өсөн генә әһәмиәтле. *Урындағы советтарға һайлауҙар.*

♦ **Урындағы ваҡыт** билдәле бер географик бүлкәт, урын өсөн билдәләнгән ваҡыт. **Урындағы промышленность** билдәле бер урын сырьеһы һәм яғыулығы иҫәбенә эшләп, күберәк шундағы ихтыяжды хеҙмәтләндергән промышленность.

**УРЫНДЫҠ** [1] *и.* **1.** Ятып йоҡлау һәм менеп ултырып, ашау өсөн иҙәндән ҡалҡыу итеп таҡтанан йәйелгән киң, оҙон урын. *Урындыҡ ҡаҙнаһы. Урындыҡ таҡтаһы.* ■ *Мин барып ингәндә Разия апай урындыҡта ята, ҡыҙы самауыр ҡуйып йөрөй ине.* Н. Мусин.

**2.** *диал.* Ултырғыс.

**УРЫНДЫҠ** [2] *и. диал. ҡар.* **урын** [2].

**УРЫН-ЕР** *и. йыйн.* **1.** Ер өҫтөнөң билдәле бер урыны, участкаһы. *Йылҡыбай был урын-ерҙе оҡшатып, яр буйында оҙағыраҡ йөрөргә теләһә лә Зөһрәне күреп ҡалған Аллабирҙе .. уны тирмәгә инергә ҡыҫтай башлай.* «Алдар менән Зөһрә». / Эш-хәлдәге тейешле кимәл. *Урын-еренә еткереп эшләү.*

**2.** Урын [1] (10 мәғ.) ҡаралдыһы. *Ул [ҡарауат] өҫтөнә сыҡҡанса урын-ер менән тултырылған ине.* Н. Иҙелбай.

**УРЫНЛАШТЫРЫУ** *к.* **1.** Нимәнелер билдәле бер урынға ҡуйыу. *Солтан .. ат туғарып, арбаһын урынлаштырып йөрөгән Заһит янына килде.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Тороп, йәшәр урынға индереү, ҡуйыу. *Ятаҡҡа урынлаштырыу.* ■ *Беҙҙе тәҙрәһеҙ өйгә урынлаштырҙылар.* Д. Юлтый.

**3.** Ни менәндер шөғөлләнер урынға индереү. *Укырға урынлаштырыу. Эшкә урынлаштырыу.*

**4.** Ғәмәлгә индереү, тормошка ашырыу. *[Талипов:] Беҙҙең быуын кешеләре революция яһаны, Совет власы урынлаштырҙы.* М. Тажи. /Ғәмәлгә килтереү, ғәмәлдә бар итеү, булдырыу. *Тыныслык урынлаштырыу.* ■ *Ошо дәфтәр биттәренән тормоштоң яңы формаларын урынлаштырыу өсөн көрәш мотивтары яңғырап кала.* К. Мәргән.

**УРЫНЛАШЫУ** *к.* **1.** Билдәле бер ерҙән урын алыу, берәй урынға яйлашыу. *Ашағанда Сәғиҙә нисек урынлашырға ла белмәй аптырап бөттө: аягын бөкләп тә, терһәге менән ергә таяныр та ултырып караны.* М. Тажи. *Беҙҙең полк ашығыс рәүештә арттағы позицияға урынлашты.* Д. Юлтый.

**2.** Тороу, йәшәү өсөн урын алыу. *Квартираға урынлашыу.* ■ *Колхоз идараһы Гәрәй өйөнөң урам як өлөшөнә урынлашкан.* Б. Бикбай.

**3.** Ни менәндер шөғөлләнеү өсөн бер урынға инеү. *Укырға урынлашыу.* ■ *Ул [Йәнтимер] эшкә урынлашкан, мин — юк әле.* С. Агиш.

**4.** Барлыкка килеү; ойошоу, тормошка ашыу. *Өфөлә һәм Өфө губернаһында Совет власы сағыштырмаса еңел урынлаша.* «Совет Башкортостаны», 1968, 21 март. / Ғәмәлгә ашыу, ғәмәл булыу. *Тынлык урынлаша. Тәртип урынлаша.*

**УРЫНЛЫ** *с.* **1.** Урыны нәк тура килгән, кәрәкле генә вакытта булған. *Урынлы талап. Урынлы һорау. Урынлы һүҙ. // Урынлы кулланыу. Урынлы әйтеү. Урынлы шикләнеү.* ■ — *Әсәй, урынлы ерҙә ул [атайым] юл куйһа, бер һүҙ ҙә әйтмәҫ инем. Нәмәнең урынлы, нәмәнең урынһыҙ икәнен аңлай алам.* Х. Мохтар. *Үҙемдең сығышты хәтерләйем, көсһөҙ ине, урынлы ла түгел ине, ләкин кәрәк ине.* С. Агиш.

**2.** Кылған, эшләгән берәй эш-хәрәкәткә ярашлы булған. *Урынлы мактау. Урынлы шелтә. // Урынлы шелтәләү.*

**УРЫНСЫЛЫК** *и. кит.* Дөйөм эшкә зыян килтереп, урындағы тар мәнфәғәттәрҙе генә күҙәтеү хәле. *Урынсылыкка каршы көрәшеү. Урынсылык караштарын алға һөрөү.*

**УРЫНТЫН** *р. диал.* Йәшерен. *Урынтын һөйләшеү.*

**УРЫНҺЫҘ** *с.* **1.** Кәрәкмәгәнгә әйтелгән, эшләнгән һ. б. *Урынһыҙ һүҙ. Урынһыҙ шик. // Урынһыҙ кулланыу. Урынһыҙ шаярыу.* ■ *Тимер кайһылай күмеү тураһында урынһыҙ һорау биреүенә әсенән оялып, һүҙҙе башка якка борорға ашыкты.* Б. Бикбай.

**2.** Кылған, эшләгән берәй эш-хәрәкәткә ярашлы булмаған; нигеҙһеҙ. *Урынһыҙ йәбер. Урынһыҙ шелтә. // Урынһыҙ йәберләү. Урынһыҙ шелтәләү.*

**УРЫНҺЫҘҒА** *р.* Нигеҙле сәбәп булмаған көйө; бушка.— *Ә һин, иптәш Сынбулатов, эштә ярҙамсы, таяныр кеше аҙ, тип, урынһыҙға зарланаһың.* М. Тажи.

**УРЫНЫНА** *бәйл. функцияһында* **1.** Төп килештәге исем һәм *-ғу* формаһындағы исем кылымдан һуң килеп, бер эш-хәрәкәт йәки нәмәнең башка бер эш-хәрәкәт йәки нәмәне алмаштырғанын белдергәндә кулланыла. *Өгөт урынына көс кулланыу. Эшләү урынына уйнап йөрөү.* ■ *Калаға килгәс, теге күҙ алдымда шәүләләнгән «бәхеттәр» урынына кыйынлыктар, нужалар күрергә .. тура килгәндер.* Т. Йәнәби. *Сәғиҙә .. бумалаһын кыҙыл тушь урынына яңылыш кара тушка манып алды.* М. Тажи.

**2.** Төп килештәге исемдән һуң килеп, кем йәки нимәнеңдер сифатын, эш-хәрәкәтен һ. б. икенсе менән сағыштырғанда, уға окшатканда кулланыла; кеүек, шикелле. *Руссаны һыу урынына белеү.* ■ — *Ниңә һин Сәйеткол ағайҙы эт урынына тукманың? Шул турала һин яуап бир.* Һ. Дәүләтшина.

**УРЫҪ** *и. һөйл.* Рус кешеһе.

**УРЫҪ-УЛАК** *и. йыйн. һөйл.* Рус кешеләре.

**УРЫУ** *к.* **1.** Урак менән кыркып йыйыу. *Ашлык урыу. Урак урыу.* ■ *[Гөлбоҫтан:] Арыш урғанда: камыштай камылды кыҫып тотам, иңкәйеп урам тип, бит-кул калмай ярылып бөттө.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Урғыс менән сабыу (игенде).

**УРЫШКА** *и. диал. кар.* **яры** [1] 1.

**УРЫШКАЛ** *и.* Карағас сайыры. *Таҙ күп итеп урышкал йыйып килтерҙе лә биҙрәгә һалып кайнатты* (Әкиәттән).

**УРЫШЫУ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **урыу.** *Урак урышыу.*

**УРЯДНИК** [*рус.*] *и. кар.* **үрәдник.**

**УС** *и.* **1.** Кул һыртының кире яғы. *Куш ус. Ус төбө. Ус эсе. Уска йомарлау. Уска һалыу. Усты йомоу.* ■ *Кеҫәнән ус тултырып алып, сәтләүек бирҙем тегегә.* Т. Йәнәби.

**2.** Шуның һыйышы менән билдәләнгән үлсәү самаһы. *Һәр кем уның [Урал батырҙың] кәбеленә берәр ус тупрак һалып сыкты, ти.* «Урал батыр».

◆ **Ус аяһындай** бик бәләкәй яҫы нәмәгә карата әйтелә. *Ус аяһындай кағыҙ.* ■ *[Туктамышев — Рыҫколга:] Нисә ай үтте, ус аяһындай йәнлек тиреһе биргәнең юк.* Б. Бикбай. **Ус төбөндәге** кеүек бик якын кеүек. *Тау түбәһенән тирә-яктағы яландар, сокор-сакырҙар, карағай, кайын урмандары .. ус төбөндә кеүек кенә күренә.* М. Тажи.

**УСАДЬБА** [*рус.*] *и.* Совхоз, колхоздың һ. б. кеше йәшәгән өйҙәр һәм хужалык каралтылары урынлашкан ере. *Совхоздың үҙәк усадьбаһы.*

**УСАК** *и.* **1.** Мейестең казан аҫтына яғыла торған урыны. *Усак аҫты. Усак сығарыу. Усакка яғыу.* ■ *Как һөйәккә калған бисә усак тирәһендә урала ине.* Б. Бикбай.

**2.** *күсм.* Ниҙең дә булһа башланғысы, сығанағы, ниҙер тупланған үҙәк, урын. *Көрәш усағы. Культура усағы.*

**УСАКЛЫК** *и.* Усак сығарылған бәләкәй өй; аласык.

**УСЛАМ** *и.* Уска алып тоторлок күләм; тотам. *Бер услам сәскә.*

**УСЛАУ** *к.* Уска йомоу, уска тултырыу. *Услап һалыу. Услап тотоу.* ■ *Кулдарыма тупрак услап алам, йылдар ята усым өҫтөндә.* Р. Назаров.

**УСМА** *и.* **1.** Бер ус тултырып урылған ашлык. *Усма һалыу.* ■ *Усмаларҙан булды көлтәләр, көлтәләрҙән ҙурат куйылды.* М. Кәрим.

**2.** *кар.* **услам.**

**УСМАЛАУ** *к.* Усмаға йыйыу. *Катын арышты һул кулы менән ура, уң кулы менән усмалай.* А. Таһиров.

**УСТА́В** [*рус.*] *и.* Ниҙелер башкарыу йәки кулланыу тәртибен билдәләгән кағыҙәләр йыйылмаһы. *Хәрби хеҙмәт уставы. Устав буйынса эш итеү.* / Ниндәй ҙә булһа ойошманың төҙөлөшөн һәм эшмәкәрлеген билдәләгән кағыҙәләр йыйылмаһы. *Ауыл хужалығы артеленең уставы.*

♦ **Советтар Союзы Коммунистар партияһының уставы** партия эске тормошоноң ленинсыл принциптарға нигеҙләнгән төп законы.

**УСТАНО́ВКА** [*рус.*] *и.* **1.** Механизм, йәйланма. *Газ йыйыу установкаһы. Быраулау установкаһы.*

**2.** Хәрби орудие. *Зенит установкаһы.*

**УҪАК** *и.* Аҡһыл йәшел кабыклы, ялтыр түңәрәк япраклы эре ағас. *Ак уҫак. Кара уҫак. Уҫак япрағы.* ■ *Уҫак янһа, шартлай-шартлай быҫкып яна.* К. Даян.

**УҪАКЛЫК** *и.* Уҫак ағастары үҫкән урын.

**УҪАЛ** *с.* **1.** Үткер, киҫкен тәбиғәтле; әсе телле. *[Сәгиҙә:] Иллә уҫалһың да инде, инәй. Тимерсе Әптерәйҙе күҙгә баҫкан бесәй кеүек бейетәһең икән.* М. Тажи. / Яман, кырағай, йырткыс холоклө; ажарлы. *Уҫал эт. Уҫал ат.* ■ *[Гөлйөҙөм:] Анау кыйыш мөгөҙ өлкән ала һыйыр уҫал да инде... Бөгөн һауғанымда ла ике рәт тибеп ебәрҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Насарлык, хаслык менән эш итеүсән; яуыз. *[Хужа:] Беҙҙең был сиркәү старостаһы бик уҫал кеше. Ул күп кешене тотоп бирҙе инде.* Д. Юлтый. / Асыу йәки хаслыкты сағылдырған. *Уҫал күҙ. Уҫал сырай.* ■ *Әхмәт Хәмиткә яман уҫал караш ташланы.* Б. Хәсән.

**3.** Хаслыкка, яуызлыкка королған, хаслык, яуызлык менән һуғарылған. *Уҫал уй. Уҫал ниәт.*

**4.** Бик үткер, кыркыу булған (эсемлеккә карата). *Уҫал кымыҙ.*

**5.** Нык төрттөрөп, үткер итеп яҙылған. *Уҫал хат.* ■ *[Хашимов] өлкә газеталарында бер нисә хикәйә, уҫал ғына мәкәләләр менән сығыш яһап, үҙен таныткан.* Б. Бикбай.

**6.** Каты, көслө дәрәжәлә беленгән (тәбиғәт күренешенә карата). *Уҫал кыш.* ■ *Ай уҫал ел кырҙағы бер йәмде, бар моңдо киҫә.* Ш. Бабич. / Бәлә-каза, зарар килтергән, уңайһыҙлык тыуҙырған. *Уҫал тормош тәүлек йөрәгенә үткер, уҫал хәнйәр каҙаны.* Ғ. Амантай. *Урман уҫал — төнөн уҙыусының ат һәм туның талап кайтара.* Ғ. Сәләм.

● *Кыҙымдың кәйнәһе уҫал, үҙемдең киленем уҫал.* Әйтем.

**УҪАЛЛАНЫУ** *к.* Уҫалға әйләнеү, уҫал булыу. *[Сәхипъямал — бригадирга:] Бик уҫалланып китмә. Бер кем дә һиңә уҫалланырга юл куймаҫ.* Ш. Насыров.

**УҪАЛЛАШЫУ** *к.* Уҫаллык күрһәтеү, уҫаллыкка һалышыу.— *Һеҙҙең газетаның производствоға ярҙамы шулай буламы? — тип һораны ул [Саҙри — Ильястан], был юлы үҙе уҫаллашып.* Ғ. Ибраһимов. *[Гөлшат — бәрәскә:] Тулама, тулама! .. Улай, донъяға тыуҙым тигәс тә артык уҫаллашырга ярамай.* С. Мифтахов.

**УҪАЛЛЫК** *и.* **1.** Уҫал кешегә хас сифат, кылык. *Колош мулла үҙенең байлығы, уҫаллығы менән тирә-якта дан тоткан бәрәү.* Т. Хәйбуллин. *[Марат:] Уҫаллык ул миндә лә бар. Донъя булғас, уҫаллык та кәрәк.* К. Даян.

**2.** Берәй төрлө уҫал, сая, яуыз эш, кыланыш. *Уҫаллык итеү. Уҫаллык эшләү.* ■ *— Хашимовты әйтәм,— тине Нигмәт, ..— уҫаллығын итеп кенә алдан бара инде ул. Ә былай егетең артык шәп саңғысыларҙан түгел.* Б. Бикбай.— *Һалдаттарҙы киҫәтегеҙ, ерле халыкка карата бер ниндәй ҙә уҫаллык кылмаһындар,— тине генерал.* Ғ. Аллаяров.

**3.** Әшәкелек, этлек, яуызлык. *Кешенән уҫаллык күреү. Уҫаллык уйлау.* ■ *Ныязгол, был юлы уҫаллык менән бер эш тә сыкмаҫын аңлап, киәфәтен дә, тауышын да үҙгәртте.* Һ. Дәүләтшина.

**УҪЛАПТАЙ** *с.* Ғәҙәттән тыш ҙур; бик ҙур. *Уҫлаптай кәүҙәле. Уҫлаптай ир.* ■ *— Һөйләмә юкты. Уҫлаптай башың менән бәләкәсте котортаһың.* Һ. Дәүләтшина.

**УҪМАК** *и. иҫк.* Йоҙрок һуғышы, һыуык корал һуғышы.

● *Уйындан уҫмак сыға.* Әйтем.

**УҪМАКЛАШЫУ** *к. иҫк.* Йоҙрок, һыуык корал менән һуғышыу.

**УҪТЫК** *и.* **1.** *диал. кар.* **утлык** [2].

**2.** *кар.* **һандык** [2].

**УҪЫУ** *к. диал. кар.* **уйыу** 2. *Кулды уҫып ебәреү.*

**УТ** [1] *и.* **1.** Янған нәмәнән сыккан эҫе якты газ. *Кыҙыу ут. Һүрән ут. Ут яғыу. Утка яныу. Утка кыҙыныу.* ■ *[Гөлйөҙөм] усағына ут яғып ебәрҙе.* Һ. Дәүләтшина. / *күсм.* Көслө хис, тойғо. *Кайғы-хәсрәт уты.* ■ *Ғишык уттарында янып-көйөп, кауышыр көнөм уйлап ябыктым* (Халык йырынан)./ *күсм.* Янып торған дәрт, ялкын. *Көрәш уты. Ярыш уты.*/ *күсм.* Бик ярһыу, уңған тәбиғәтле кешегә карата. *[Сынбулатов:] Һо, торғаны менән ут инде улар, ут! Эшкә лә үжәттәр, уйынын да булдыралар.* М. Тажи.

**2.** Йылыныу, бешеренеү өсөн кырҙа, ерҙә яндырылған ағас өйөмө. *Быжырмәргән юл өҫтөндә янып яткан утка тап була* (Әкиәттән).

**3.** Йорт, каралдыны ялмап алған ялкын. *Ут сыға. Ут төртөү. Ут һалыу.* ■ *Ул арала өйҙөң түбәһен ут ялмап алды.* Д. Юлтый.

**4.** Шәм, сырак яктыһы. *Электр уты. Шәмгә ут алыу. Өйгә ут үткәреү.* ■ *Кис, больницала ут кабынғас, балконға сыктым.* С. Агиш. / *күсм.* Кешенең берәй төрлө эске кисерешенең күҙендә ялтырап сағылышы. *Башта ул, минең кемлегемде белмәҫ борон, үҙҙәрендә уҫал уттар уйнатып .. күҙҙы.* И. Ғиззәтуллин. *[Хыялбай] уйлана ла һөйләнә үҙ-үҙенән, йәшел шатлык уты сәсрәй күҙенән.* Ш. Бабич.

**5.** Атыш. *Артиллерия уты. Ут асыу. Утка тотоу. Ут һыҙығы.* ■ *Дошмандың ут көсө бермә-бер йомшарҙы.* Ғ. Әмири. *Иҫкәрмәҫтән туп атылды, Порт-Артурҙы ут алды* (Бәйеттән). /Пуля, снаряд һ. б. яуып торған урын; һуғыш. *Кешеләр ут эсендә, туп йәҙрәләре аҫтында үлем көтә.* Д. Юлтый. *Агайҙарҙы алыҫ ут эсенә алып китте йондоҙ кашкалар.* Р. Бикбаев.

♦ **Баҫҡан ерҙән ут сығарыу** (*йәки* **сәсрәтеү**) көс, дәрт менән елкенеү. *Баҫҡан еренән ут сығарып, маңлайынан тир сығарып эшләмәгән ир — ир түгел ул.* М. Тажи. **Ике ут араһында (ҡалыу, булыу)** арала, ауыр хәлдә (ҡалыу). **Йылан уты** *диал. ҡар.* **монар** 2. **Ҡау аҫтына ут төртөү** кеше араһын аҫтыртын болғатыу. **Ҡуян уты** *диал. ҡар.* **монар** 2. **Сыҫҡан уты** 1) бызлап ҡына янған ут; 2) *диал.* бызлауыҡ. **Ут баҫыу** ярһып атлығыу. *Ҡамсат бүреккәйеңде ҡырын һалып, ҡайһы илдәрҙән киләһең ут баҫып* (Халыҡ йырынан). **Ут бөрсәһе** бик йор, етеҙ, осоп-төшөп торған балаға, йәш кешегә ҡарата әйтелә. **Ут йотоу** ҡайғы, хәсрәттә яныу. *Мөнирә ауырлы көйө ут йотоп, яңғыҙ ҡалды.* З. Ғәлимов. **Утҡа һалыу** ҡайғыға төшөрөү. *[Үмәр:] Утҡа һалды бит, йөҙө ҡара, битkә ҡара яҡты бит суҡа бала.* Һ. Дәүләтшина. **Ут сәсеү** 1) ажғырып тороу, уҫал булыу. *Ауыҙынан ут сәсә;* 2) *ҡар.* **ут уйнатыу.** *Ут сәсеп торған егет.* **Ут сәсрәтеү** *шул уҡ* **ут сәсеү. Ут уйнатыу** уңған, үткер булыу, яныш тороу. *Ут уйнатып бейеү. Ут уйнатып эшләү.* **Ут ташлау** көсеп китеү. **Ут төртөү** 1) ут тоҡандырыу. *Мейескә ут төртөү;* 2) ут һалып яндырыу, үртәү. *Кәбәнгә ут төрттөләр.*

**УТ** ² *и. иҫк.* Үлән. *Күк ут.* ■ *Арҡауылдың утынан ат утлатҡан каруансы* (Ҡобайырҙан). **Бабасыр уты** ҡара-ҡаршы япраҡлы, күк йондоҙ сәскәле ялан, туғай үләне. **Болан уты** боланут. **Дөйә уты** ваҡ һепертке сәскәле, оҙонсараҡ япраҡлы бер йыллыҡ ҡый үләне. **Кенә уты** тарбаҡай һабаҡлы, ялбыр өйкөм сәскәле, сәнскәк орлоҡло ағыулы үлән. **Сәй уты** еле һабаҡлы, ҡабаҡ япраҡлы, һары сәскәле, эре йәшелсәле баҡса үҫемлеге. **Тырнаҡ уты** һары өйкөм сәскәле, һыңар һабаҡлы, һабаҡ төбөнән сыҡҡан оҙонсараҡ йөнтәҫ япраҡлы ялан үләне.

**УТАЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **утау** ¹. *Уталған картуф.*

**УТАР** [*рус. хутор*] *и.* **1.** *тар.* Ауылдан ситтәге алпауыт, баяр йорто. *Кузьмин утары Айҙаҡай ауылынан етмеш саҡырым самаһында ине... Был утар тотошо менән төрлө ағас, оло емеш баҡсаһы эсендә йәшеллеккә күмелеп ултыра.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ауылдан күсеп ултырған бер нисә йорт һәм шулар биләгән ер. *Утарға күсеү. Утарҙа йәшәү.*

**3.** Ауылдан алыҫҡа сығарып һалынған йорт, ҡаралдылы бәләкәй хужалыҡ берәмеге.

**УТАРЛАУ** *ҡ.* Утарҙа (2 мәғ.) йәшәү. *Утарлап ятыу.* ■ *Ҡарағөлөмбәт өс ҡатыны менән утарлап, мал көтөп ятҡан.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**УТАУ** ¹ *ҡ.* Игенлек, йәшелсәлекте ҡый үләненән таҙартыу. *Тәпке менән утау. Ҡул менән утау. Картуф утау. Утауҙа йөрөү.*

**УТАУ** ² *и.* **1.** *иҫк.* Еңел бәләкәй тирмә. *Ҡуҙыйкүрпәстең көткәне Маянһылыу булһа ла, ул үҙенең аҡ утауынан сыҡманы.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** *диал.* Ҡыуыш.

**УТАШЫУ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **утау** ¹. *Баҡса уташыу.*

**УТЙЛЬ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. йыйн.* Файҙаланыр өсөн яраҡһыҙға әйләнеп, икенсе тапҡыр эшкәртеүгә тәғәйенләнгән ташландыҡ нәмә (мәҫ. сепрәк, ҡағыҙ, тимер-томор). *Иҫке кейемде утилгә тапшырыу.*

**УТКҮҘ**: **уткүҙ себен** ҡыҙғылт башлы, йәшкелт ҡанатлы себен. *Аттарҙың боҙҙо маҙаһын уткүҙ себен, бөгәләк.* Б. Бикбай.

**УТ-КҮҘ** *и.* Янғын, үрт (ут хәүефе хаҡында һөйләгәндә ҡулланыла). *Ут-күҙҙән һаҡланыу.* ■ *[Мөслимә:] Урын ашы бешерһәгеҙ-нитһәгеҙ, ут-күҙҙән һағыраҡ булығыҙ.* Ф. Иҫәнғолов.

**УТЛАҠ** *и. ҡар.* **утлау** ².

**УТЛАНЫУ** *ҡ.* Хис, тойғонан яныу (күҙгә ҡарата). *Кудряшовтың күҙҙәре утланды, ирендәре ҡалтыраны.* Д. Юлтый.

**УТЛАТЫУ** *ҡ.* Үлән ашатыу, үләнгә ҡушыу. *Арҡауылдың утынан ат утлатҡан каруансы* (Ҡобайырҙан).

**УТЛАУ** ¹ *ҡ.* Ҡырҙа үлән ашау. *Көҙгө үләнде утлап йөрөгән аттарҙың ҡыңғырау тауыштары бик тонoҡ ҡына яңғырап ҡуя.* Ғ. Хәйри.

**УТЛАУ** ² *и.* Мал утлай торған ер; көтөүлек. *Мин өсөнсө йыл инде ат ҡарайым. Иртәнсәк аттарҙы ҡыуыш янына алып ҡайтам. .. Кис тағы ла утлауға ҡыуам.* Х. Зарипов.

**УТЛАУЫҠ** *и.* **1.** *ҡар.* **утлау** ².

**2.** *ҡар.* **утлыҡ** ² 2.

**УТЛЫҒЫУ** (утлыҡ*ы*) *ҡ. диал.* Үткәшеү. *Эсе утлыҡҡан.*

**УТЛЫҠ** ¹ *и.* Самауырҙың төбөндәге ҡуҙ ятҡан ере. *Ул ҡатын самауырҙың ҡапҡасын асты: «Бына бында һыу һалаһың, бында күмер»,— тине утлыҡты төртөп күрһәтеп.* Ғ. Ғүмәр.

**УТЛЫҠ** ² *и.* **1.** Йорт эсендәге бесән һаҡлай торған ер; бесәнлек.

**2.** Малға бесән һала торған урын; утлыҡса. *Осоп ҡына һыбай килеп төшә, атын ҡуя утлыҡ эсенә.* Б. Вәлит.

**УТЛЫҠСА** *и.* Малға бесән һала торған урын; утлыҡ ². *Утлыҡсалар бесән менән тулы. Һәр ат бәйләп ҡуйылған.* Б. Бикбай.

**УТОПИК** *с.* **1.** Утопияға (1 мәғ.) нигеҙләнгән; ғилми түгел. / Идеаль ижтимағи ҡоролош картиналары ысынбарлыҡтан тулыһынса айырып тасуирланған. *Утопик роман.*

**2.** Утопиянан (2 мәғ.) торған, тормошҡа ашмаҫ. *Новиков күтәргән мәсьәлә минең өсөн хәл ителмәй торған утопик мәсьәлә ине.* Д. Юлтый.

♦ **Утопик социализм** *ҡар.* **социализм.**

**УТОПИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Идеаль йәмғиәт ҡоролошоноң ғилми фекер итеүгә нигеҙләнмәйенсә тасуирланыуы. / Идеаль йәмғиәт ҡоролошо картиналарын ысынбарлыҡтан, йәмғиәт үҫешендәге объектив закондарҙан тулыһынса айырып һүрәтләгән әҫәр.

**2.** Тормошҡа ашмаҫ хыял; уйҙырма, фантазия. *Күп ваҡытта кеше аҡылына һыймаған фантазияларға, утопияларға инеп китәбеҙ.* Д. Юлтый.

**УТРАУ** *и.* Бөтә яҡтан һыу менән уратылған ҡоро ер. *Куриль утрауҙары. Сахалин утрауы.*

**УТЫҒЫУ** (утыҡ*ы*) *ҡ. иҫк.* **1.** Йәш үләнгә туйыу. *Ер-һыу кибеп, урман-яландар йәшәргәс, мал-тыуар утығып, көрәйеп алғас, .. Ҡаратун ялаһына оло йыйынға йыйылған башҡорттар.* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** Көскә ултырыу, үҫеп нығыныу. *[Ныязғол] ваҡ малдың балалары бауыр күтәреп, утыҡҡас ҡына йәйләүгә сыға.* Һ. Дәүләтшина.

**УТЫҘ** *төп һ.* 30 һаны. *Утыҙҙы өскә бүлеү.* /Кем йәки нәмәнең 30-ға тиң иҫәбе. *Утыҙ йәш. Утыҙ кеше. Утыҙ сакырым. Утыҙ һум акса.*

**УТЫҘАР** *бүл. һ.* Һәр бере утыҙҙан торған, һәр бере утыҙға тиң. *Тай итеп ҡаҙағын утыҙар тиндән билдәләп, шул арала уҡ колхозсыларға һатып бөттөләр.* Б. Бикбай.

**УТЫҘЛАП** *сама һ.* Утыҙға яҡын, утыҙ тирәһе. *Утыҙлап йүгерек ат оҙонға сабырға киттек.* Д. Юлтый.

**УТЫҘЫНСЫ** *рәт һ.* Урын тәртибе 30 менән билдәләнгән. *Утыҙынсы йәш менән барыу.*

**УТЫҠ** [1] *с. иҫк.* Көслө, ныҡлы, ҙур. *Иҙел, Ҡариҙел йылғаларынан башка быларға ҡоя торған утыҡ йылғалар бар.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**УТЫҠ** [2] *с. диал.* Аҡылға һай; ахмаҡ, иҫәр.

**УТЫН** и. Яғыу өсөн әҙерләнгән ағас. *Имән утын. Сей утын. Утын ҡырҡыу. Утын ярыу.* ■ *[Хафиз:] Йомағол ҡустым, ағастарҙы һайлаңҡырап ҡырҡырға кәрәк, утынды урталайға ярып, өйөргә тырыш.* М. Тажи. *Сәлмән бер үҙе ҡалып, йәнә бик күп утын ҡырҡып өйгән дә эңер төшкәс кенә ҡайтып киткән, ти* (Әкиәттән).

**УТЫНЛЫҠ** *и.* Ишек алдындағы утын һала һәм утын ҡырҡа торған урын.

**УТЫПШЫ** [*рус.* утопший] *и. диал.* Баҡыт.

**УТЫРМА** *и.* Уҡалы, тәңкәле бәрхәт түшелдерек.

**УТЫҪМА** *и. диал.* Киндер станы.

**УФ, уф-ф-ф** *ымл.* **1.** Ауыр хис, тойғонан әйтелә. *Уф, тигәндә бөтһөн ине йөрәгем әрнеүҙәре* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ныҡ арығанда әйтелә. *[Сәғиҙә:] Уф, арыным, әллә ниңә башым да ауыртып тора.* М. Тажи.

**УФЛАУ** *ҡ. һир.* Ауыр хис, тойғонан уф тип әйтеү. *Уфлап көрһөнөү.* ■ *Бәгеркәйем өҙә уфлауҙары, ҡан һауҙыра гәмле йөрәккә.* Д. Юлтый.

**УФТАНЫУ** *ҡ.* Ауыр хис, тойғонан уф тип әйтеү. *«Ай-бай, эш ологараҡ китеп барҙы бит әле»,— тине Фәхри .. ауыр уфтанып.* Б. Бикбай. /*күсм.* Ныҡ ҡайғырыу, борсолоу. *Егет кенә кеше уфтанмаҫ ул ҡайғы-хәсрәт күреп йөрөгәнгә* (Халыҡ йырынан).

**УФЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Ауыр хис, тойғонан уф итеү, уф-ф-ф килеү. *Өләсәйем юк-барға уфылдай, һуҡрана башланымы, уның сәйе бөттө тигән һүҙ.* Р. Низамов.

**2.** Ныҡ арығанда уф тип әйтеү, уф-ф-ф килеү. *[Тимербулат:] Әсәй ниңә уфылдайһың? — Арып киттем. Ошо арала картатайың менән картәсәйеңде ҡарай-ҡарай йөҙәнем.* Һ. Дәүләтшина.

**УХ** [1], у-у-ух *ымл.* Асыуланыу, һоҡланыу кеүек көслө тойғоно белдергәндә әйтелә. *[Котлобай — Гөлйөҙөмгә:] Ух, һин, бик үҫалһың икән.* Һ. Дәүләтшина. *[Өрәк:] Ҡулымда күҫәгем барҙа ҡаршы килегеҙ. Килеп ҡарағыҙ: йә һеҙ, йә мин... У-у-ух!* И. Ғиззәтуллин.

**УХ** [2], **у-у-ух** *окш.* Ауыр нәмә төшкәндә, ҙур нәмә шартлағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ух итеп ярылыу.*

**УХЫЛДАУ** [1] *ҡ.* Ух [1] итеү, ух килеү. *[Асатай] Ныязғолға ырғып ташланырға әҙерләнгән кеүек, күҙҙәрен ҡыҙыл ҡан баҫҡанса акрайып, ухылдап торҙо.* Һ. Дәүләтшина.

**УХЫЛДАУ** [2] *ҡ.* Ҡаты, һаңғырау тауыш сығарыу; гөрһөлдәү. *Ауыр бомбаларҙың ярылыуынан ер ухылданы.* Х. Ғиләжев.

**УҺУ** *окш.* Өкө, ябалаҡ ҡысҡырған тауышты белдергән һүҙ. *Ябалаҡ уһу тип ҡысҡырҙы.*

**УҺУ-УҺУ** *окш.* Ҡабат-ҡабат уһу тип ҡысҡырған тауышты белдергән һүҙ. *Уһу-уһу итеү. Уһу-уһу килеү.*

**УҺЫЛДАУ** *ҡ.* Уһу-уһу тип ҡысҡырыу. *[Салауат:] Әһә, бына өкө уһылданы.* Б. Бикбай.

**УЧАСТКА** [*рус.* участок] *и.* **1.** Ер майҙанының берәй маҡсатта файҙаланыла торған айырым өлөшө. *Баҫыу участкаһы. Төҙөлөш участкаһы.* ■ *Хөрмәттең атаһы леспромхоздың урман участкаһында эшләй. Унда туғын саба, клепка юна.* Ж. Кейекбаев. /Фронттың берәй ғәскәри берләшмә хәрәкәт иткән өлөшө. *Фронт участкаһы.*

**2.** Берәй төрлө эшмәкәрлек өлкәһе, тармағы. *Эштең яуаплы участкаһы.*

**3.** Бер эш менән билдәләнгән административ-территориаль өлкә. *Врач участкаһы. Һайлау участкаһы.* ■ *Сәйҙел һала завод нигеҙен, техник булып корпус төҙөшә. Иртән иртүк участкаға китә, эштән арып ҡайта, кис еткәс.* Ғ. Сәләм. /Производство, предприятие, цехтың һ. б. берәй төрлө билдәһе буйынса бүленә торған өлөшө. *Тәжрибә участкаһы.* ■ *Сынбулатов, ҡайһы бригада иртәгә ниндәй участкала эшләргә тейеш икәнен әйтә башланы.* М. Тажи.

**УЧАСТКОВЫЙ** [*рус.*] *и. һөйл.* Үҙенең ҡарамағындағы участкала тәртип күҙәткән милиция офицеры.

**УЧЕНИЕ** [*рус.*] *и.* Хәрби күнекмә уйыны. *Тактик учение. Учениела ҡатнашыу.* ■ *Апрель аҙаҡтарында полк учениеға сыкты.* З. Рафиков.

**УЧЁТ** [*рус.*] *и. ҡар.* **иҫәп** 2.

**УЧИЛИЩЕ** [*рус.*] *и.*Ғәҙәттә берәй төрлө махсус тәғәйенле урта уҡыу йорто, мәктәп. *Хәрби училище. Тимер юл училищеһы.*

**УЧРЕЖДЕНИЕ** [*рус.*] *и.* Етәкселеге, хеҙмәткәрҙәре булған, билдәле бер өлкәлә эш алып барған ойошма. *Ғилми учреждениелар. Ижтимағи учреждениелар. Дәүләт учреждениелары. Учреждениела эшләү.*

**УША** *и.* **1.** Мейестең урта тошондағы һикәлтә.

**2.** Мейескә ҡуша яһалған урын. *Ушаға ултырыу. Ушаға менеп ятыу.*

**УШАНДАҠ** *терк. иҫк. кит.* Шулай уҡ.

**УШАНЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **ҡыҙығыу** 1. *Йәшел генә сана һай ҡушауа, ҡыҙ балаҡай күреп ушана* (Халыҡ йырынан).

**УШҠЫРЫУ** *ҡ.* Ярһып, танау төбө менән өрөү (аҫау йылҡыға ҡарата). *Туғарылмаған ҡара туры аттар Ныязғол ҡапҡаһы төбөндә .. ушҡырып, сапсынып тора.* Һ. Дәүләтшина.

**УЯ** *и.* Ике тау араһындағы соҡор; үҙәк. *Уя эсендәге тау башына менгәндә лә, һыртҡа менгәс тә, улар [малайҙар] ат юлдарына иғтибар итте.* Ж. Кейекбаев. *Шулай йөрөй торғас, байтаҡ ер киткәнбеҙ... Өйкөм-өйкөм муйыл үҫкән бер уяға килеп төшкәнбеҙ.* Н. Мусин.

**УЯҘ** *и.* Тирә яҡтағы ҡалҡыуҙар араһындағы киң түбән урын; уй. *Көндөҙ тауҙар зәңгәр монарҙа йөҙә, төн булһа, .. уяҙҙарға ап-аҡ томан эркелә.* Ш. Янбаев.

**УЯЛҠЫ** *и. диал.* Уйпат.

**УЯМҠЫР** *и. диал.* Уйпат.

**УЯМЫҠ** *с.* Уйылып, соҡорланып торған; уйынҡы. *Уямыҡ ерҙә бесән һәйбәт үҫә.*

**УЯНЫУ** *ҡ.* **1.** Йоҡо хәленән арыныу, уяу хәлгә килеү. *Шәрәф күптән уянған булһа ла, иртәнге һалҡындан сирҡаныр, тормай ята ине.* Б. Бикбай. /Тыныс хәлдән арынып, хәрәкәт менән тулыу; йәнләнеү. *Таң яңы ҡыйылып килгән ваҡыт. Барса тәбиғәт уянған. Ҡоштар сутылдаша.* Ш. Насыров. *Ҡалын ҡар аҫтында баҫылып ятҡан ер ҙә уянды.* М. Тажи. /*күсм.* Актив хәрәкәткә күсеү, актив эшкә керешеү. *Милләттәрҙең уяныуы уның бәгзе ағзаларының ҡайғы һәм хәсрәте менән башланасағына ышанысыбыҙ тулы ине.* М. Ғафури.

**2.** *күсм.* Барлыҡҡа килеү, ғәмәл булыу (аңға, тойғоға ҡарата). *Тойғо уяна. Аң уяна. Фекер уяна. Шик уяна.* ■ *Аһ, ниндәй ярһыу ҡыуаныс, әйтеп бөткөһөҙ ләззәтле сәм уяна ине Юламан ҡарттың күңелендә был уйҙан!* З. Биишева.

**УЯНЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **уяныу 1.**

**УЯТЫУ** *ҡ.* **1.** Йоҡонан арындырыу, уяу хәлгә килтереү. *Әлеге шаян елдәр ҡуйындарға инеп, ҡытыҡлап, эш улдарын йоҡонан уятты.* Ғ. Амантай. /Тыныс хәлдән арындырып, хәрәкәт менән тултырыу; йәнләндереү. *Яҙғы ҡояш тәбиғәтте уята.* /*күсм.* Актив эшмәкәрлеккә, хәрәкәткә килтереү. *Илде уятыу.*

**2.** *күсм.* Барлыҡҡа килтереү, ғәмәлгә килтереү (аңды, тойғоно). *Хис уятыу. Шатлыҡ тойғоһо уятыу.* ■ *Уның [Камилдың] бөтә ҡыланышы Емештең күңелендә ниндәйҙер хәүеф уята.* З. Биишева.

**УЯУ** *с.* **1.** Йоҡо хәленән азат; йоҡоһоҙ. *Мин иртә менән .. занятиеға китәм. Ул ваҡыт Нина йоҡлай. Фәҡәт Иванов ҡына уяу була. Ул мине оҙатып, ишек бикләп ҡала.* Д. Юлтый. //*Мин төндәрҙе уяу үткәргәндә, һин йоҡлайһың иҙрәп, Хәтимә.* Х. Ҡунаҡбаев.

**2.** *күсм.* Тирә-йүндәге эш-хәлгә ныҡ иҙгер; һаҡ, сос. *Үртәмәһен өсөн ерҙе ҡотһоҙ ялҡын уяу булһын, уяу булһын донъя халҡы!* Ш. Бикҡол. *Һауғанда һөтөгөҙҙө һыйырҙан эсермәй, түкмәй, сәсмәй һауығыҙ. Сосораҡ, ҡуҙғалыбыраҡ, уяуыраҡ йөрөргә кәрәк!* Т. Хәйбуллин.

**УЯУЛАНЫУ** *ҡ.* Сосҡа әйләнеү, һиҙгерләнеү. *Әллә бүре үҙе ҡурҡаҡланған, әллә кешеләр уяуланған, уға һис тә һарыҡ итеашарға тура килмәй башланы, ти* (Әкиәттән).

**УЯУЛЫ-ЙОҠОЛО** *с.* Ярым йоҡоло, уяу менән йоҡо араһындағы. *Уяулы-йоҡоло хәлдә булыу.* //*Уяулы-йоҡоло ятыу.* ■ *Командир уяулы-йоҡоло килеш трубканы алды.* Ә. Бикчәнтәев. *Тәнзилә әбейҙең уяулы-йоҡоло һөйләнгән һүҙҙәре уның [Сәгиҙәнең] ҡолаҡ төбөнән китмәне.* М. Тажи.

**УЯУЛЫҠ** *и.* Тирә-йүндәге эш-хәлгә ныҡ һиҙгерлек; һаҡлаҡ. *Революцион уяулыҡ.* ■ *Ҡайһы бер кешеләр, һәр ерҙә лә уяулыҡ кәрәк, тип мығырлай, ә үҙҙәре һиҙгерлектең ни төҫлө икәнен дә белмәй.* И. Абдуллин.

# Ү

**Ү** Башҡорт алфавитының егерме һигеҙенсе хәрефе.

**ҮБЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **үбеү.**

● *Йөҙө үбелгәндең ҡулы үбелмәҫ.* Мәҡәл.

**ҮБЕҮ** (үп*е*) *ҡ.* Йылы тойғонан ирен тейҙерен һурыу. *Биттән үбеү. Ҡулды үбеү. Маңлайҙан үбеү.* ■ *Ғаббас Фатиманың илаған йәшле күҙҙәренән үпте лә булмәһенән сығып китте.* Ш. Шәһәр. *Сәгиҙә Булатын ҡурҡрәгенә ҡыҫып һөйҙө, үпте.* М. Тажи. *Уң битенән үҙен һурып үптем, ҡарттар беҙгә ҡарамай, йәнем, тип* (Халыҡ йырынан).

**ҮБЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **үбеү.** *Үбешеп күрешеү. Ҡосаҡлашып үбешеү.*

● *Үбешкән дә көлөшкән, һуңынан башына уй төшкән.* Әйтем.

**ҮБӘК** *и.* **1.** Аттың муйыны боҙолғанда яраһына ҡамыт теймәһен өсөн бәйләп ҡуйылған йомшаҡ нәмә. *Үбәк бәйләү.*

**2.** *диал. ҡар.* **төкө** [1].

**ҮГЕҘ** [1] *и.* **1.** Һыйыр малының иркәге. *Дүнән үгеҙ. Екке үгеҙ. Тана үгеҙ. Нәҫел үгеҙе.* //*Үгеҙ башмаҡ. Үгеҙ башмаҡ. Үгеҙ быҙау.* ■ *Һыйыр һауғанда ер тырнап үкереп, һауынсыларҙы ҡурҡытып бөтә торған .. үгеҙҙе Айбулат таш һарайға айырып бикләне.* Һ. Дәүләтшина. **Айғыр үгеҙ** беселмәгән үгеҙ. **Ҡонан үгеҙ** ике йәштән өс йәшкә тиклемге үгеҙ.

**2.** Айыры тояҡлы эре хайуандарҙың иркәге. *Боландың үгеҙе. Мышының үгеҙе.*

**3.** *күсм.* Ҙур кәүҙәле көслө кешегә ҡарата әйтелә.

**4.** *күсм.* «Үгеҙ йөҙөк» тигән уйындағы йөҙөктө эҙләгән кеше.

◆ **Үгеҙ йөҙөк** *ҡар.* **йөҙөк. Үгеҙ күгәүене** *ҡар.* **күксә** [1]. **Үгеҙ күҙе** аҡһырғаҡтыҡы һымағыраҡ эре япраҡлы, ҡыҙғылт һары сәскәле, төҙ, бейек һабаҡлы дарыу үләне. **Ҡул үгеҙе** *ҡар.* **мөншөгөр.**

● *Балыҡты йөҙөргә өйрәтмәйҙәр, үгеҙҙе һөҙөргә өйрәтмәйҙәр.* Әйтем.

**ҮГЕҘ** [2] *и. диал.* **1.** *ҡар.* **тәкә** [2].

**2.** *ҡар.* **асамай** [1].

**ҮГӘЙ** *с.* **1.** Ҡан яғынан ят (атай, әсәй, балаға ҡарата). *Үгәй бала. Үгәй ҡулына ҡалыу.* ■ *— Әсәй икенсе ирға тормошҡа сыҡты. Ә миңә үгәй ата ҡулында йәшәргә тура килмәне. Үҙ көнөмдө үҙем күрергә, донъя менән танышып йөрөргә тип, ун ике йәшемдә тыуған йорттан сығып киттем.* М. Тажи. *Үгәй ҙә түгел, үҙ әсәйем һыҡтамай ҙа димләп ултыра* (Сеңләүҙән).

**2.** *күсм.* Мөнәсәбәт яғынан ят. *Үгәй кеше булды үҙ илендә, ҡулға алынып ситкә ҡыуылды.* М. Хәй.

**ҮГӘЙ-КАҒАЙ** *и. йыйн.* Үгәй балалар. *Ғәлим үгәй-кағай айырмай тырышып эшләй ине.* Ҡ. Туйкин.

**ҮГӘЙҺЕНЕҮ** *к.* Ят итеп күреү. *Сит ерҙе үгәйһенеү.*

**ҮГӘЙҺЕРӘҮ** *к.* **1.** Үҙеңде үгәй, сит итеп тойоу. *Үгәйһерәп йәшәү.*

**2.** *күсм.* Үҙеңде кәрәкһеҙ, ят итеп тойоу. *Бакса ауылының етеп килгән бер егете үгәйһерәп яткан шул бушлыкка әлеге карағайҙарҙың тәүге үҫентеләрен килтереп ултырткан.* Ғ. Вәлиев.

**ҮГӘЙҺЕТЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **үгәйһетеү.** *Үгәйһетелгән бала.*

**ҮГӘЙҺЕТЕҮ** *к.* **1.** Үгәй, ят күреп, йәберләү, кыйырһытыу. *Үгәйһетеп карау.* ■ *[Сәғит:] Әсәй үҙемдеке булмаһа ла мине һис касан үгәйһетмәне, үҙ кыҙы Фәриҙә менән тиң караны.* «Ағиҙел», 1965, № 4.

**2.** *күсм.* Кәрәкһеҙ, ят итеп һанау; ситләтеү. *Һине бер кем үгәйһетмәҫ беҙҙең ауылда.* Н. Иҙелбай.

**ҮДӘГЕ** *и.* Приморье һәм Хабаровск крайҙарында йәшәгән халык һәм шул халыктың бер кешеһе (тунгус — манжур телдәренең береһендә һөйләшә). *Үдәге теле. Үдәге кыҙы.*

**ҮҘ** *билд. а.* **1.** Эйәлек ялғаулы исем алдынан килеп, шуның билдәле шәхескә мөнәсәбәтле, шәхескә хас йәки шәхестең милке булыуын белдерә. *Үҙ атаһы. Үҙ башы. Үҙ исеме. Үҙ кейеме. Үҙ каны. Үҙ фекере. Үҙ яйы.* ■ *Башкорттар үҙ ерендә, тыуған үҫкән илендә кош булып куккә менһендәр, балыктай һыуҙа йөҙһөндәр, боландай ерҙә елһендәр — ана шулай тигән ул.* Салауат Юлаев. / *с. мәғ.* Күңелгә якын; ят түгел. *Үҙ булыу. Үҙ итеү. Үҙ күреү.* ■ *Сөнки улар үҙ түгелдәр, сөнки улар ситтеке, сит малы, сит әйбере, сит илдеке, сит йорттоко.* Ш. Бабич.

**2.** Эйәлек ялғауы менән килеп, эш-хәрәкәттең шул билдәләнгән шәхес тарафынан башкарылғанын белдерә. *Ул [Ғариф] үҙе йөрөмәһә лә уның аксаһы йөрөй.* Ғ. Хәйри. / Эш-хәрәкәттең башкарылышына билдәле шәхес кенә мөнәсәбәтле булғаиын, башкалар катнашмағанын белдерә. *Бала үҙе колап төштө. Сәгәт үҙе туктаған.*

**3.** Эйәлек бәйләнешендә килеш ялғауы кабул итеп, шул билдәләнгән шәхескә баҫым яһау, иғтибарҙы йүнәлтеү өсөн кулланыла. *Йомошоғоҙҙо минең үҙемә әйтегеҙ. Хатты әбейҙең үҙенә тапшыр. Атты бригадирҙың үҙенән һора.* ■ *Йәштәр баҫкан йөҙөмдө, хәсрәт алған минең үҙемде* (Сеңләүҙән).

**4.** Сифат яһаусы *-лы* ялғауы менән торған һүҙҙәрҙән алда килеп, шәхескә хас айырым бер сифатты белдергән кушма һүҙ яһай. *Үҙ фекерле. Үҙ яйлы.*

◆ **Үҙе баш, үҙе түш** бөтәһен дә үҙе хәл итә алған кешегә карата әйтелә. **Үҙенә башка** *кар.* **башка. Үҙенә күрә** *кар.* **күрә. Үҙенә калһа** *кар.* **калыу. Үҙенә тигәндә** үҙенә эшләгәндә, үҙенә файҙа булырҙай булғанда. *Үҙенә тигәндә бер ҙә йыбанмай.* **Үҙеңдекен итеү** үҙеңсә эшләү, үҙ һүҙеңде һүҙ итеү.

● *Һәр нәмәнең үҙ батманы.* Мәкәл.

**ҮҘАҒАС** *и.* Ағастың төп өлөшөн тәшкил иткән кайыры менән үҙәк араһында урынлашкан тығыҙ матдәһе (катмарлы тукымаһы). *Имәндең үҙағасы. Кайындың үҙағасы.*

**ҮҘАЛДЫНА** *р.* **1.** Ишетелер-ишетелмәҫ рәүештә, әкрен, үҙенә үҙе. *Беҙ барып ингәс, Шакир, үҙалдына һөйләнә-һөйләнә, рюкзагын әҙләргә тотонно.* Ж. Кейекбаев. *Маһигөл .. яңғыҙ, үҙалдына: «Их улым, улым. Ниңә инде хәлеңде әсәйеңдән йәшерҙең, хәбәр итмәнең?»* Б. Бикбай.

**2.** Сит тәьҫирҙән башка, башкаларҙың катнашынан тыш. *Ә буш көршәк иһә тора-тора үҙалдына сатнай.* М. Кәрим. *Сирттерә [сазды], аһ, һис тәкәт юк, йәш килә үҙалдына.* Ш. Бабич.

**3.** Ирекле, бойондороkһоҙ рәүештә, үҙе генә. *Үҙалдына донъя көтә башлагас һәм йортта йәш бала ла булғас, Сәғиҙәнең тормош мәшәкәте артты.* М. Тажи.

**ҮҘАЛЛЫ** *с.* **1.** Бойондорокта булмаған, ирекле эш иткән; бойондороkһоҙ. *Үҙаллы дәүләт.* / Үҙ хеҙмәте, эшмәкәрлеге менән үҙенә материаль бойондороkһоҙлок тәьмин итә торған. *Үҙаллы кеше.*

**2.** Төп үҙенең көсө, үҙенең инициативаһы нигеҙендә башкарыла торған. *Үҙаллы тикшереноү. Үҙаллы эш. // Үҙаллы эшләй башлау.* ■ *Хәлиҙә хужанан да, эшселәрҙән дә йәшенеп, төндәрен хәреф йыйырға ла үҙаллы өйрәнеп йөрөнө.* Х. Мохтар.

**3.** Сит тәьҫирҙән, йоғонтонан ирекле, үҙ юлы менән киң үҫеш алған. *Үҙаллы караш булдырыу. Үҙаллы фекер йөрөтөү.*

**4.** *лингв.* Үҙенә хас мәғәнәһе булған. *Үҙаллы кылым. Үҙаллы һүҙ төркөмдәре.*

**ҮҘАЛЛЫЛЫК** *и.* Үҙаллы булыу сифаты. *Дәүләттең политик үҙаллылығы. Фекерҙәрҙең үҙаллылығы. Үҙаллылык күрһәтеү.* / Үҙаллы эш итеү ғәҙәте, үҙаллы эш-хәрәкәт. *Баланы үҙаллылыкка өйрәтеү.*

**ҮҘАҢ** *и.* Тормошта, йәмғиәттә үҙ-үҙеңде, үҙеңдең әһәмиәтеңде, үҙеңдеңролеңде тулыһынса аңлау хәле. *Халыктың милли үҙаңы уяныу. Хеҙмәтсәндәрҙең граждандык үҙаңы үҫеү.*

**ҮҘ-АРА** *с.* Бер-береһенә карата мөнәсәбәттәш. *Үҙ-ара бәйләнеш. Үҙ-ара дуҫлык. // Үҙ-ара бүлешеү. Үҙ-ара кыскырышыу. Үҙ-ара һөйләшеү. Үҙ-ара ярышыу.* ■ *Батырҙар үҙ-ара кәңәш корғандар ҙа йүгерешеүҙе һыңараякка тапшырғандар* (Әкиәттән).

**ҮҘБЕЛДЕКЛЕ** *с.* Кеше менән иҫәпләшмәй, үҙе белгән булып эш итеүсән. *Үҙбелдекле кеше.*

**ҮҘБЕЛДЕКЛЕЛЕК** *и.* Үҙ ихтыярың, теләгең һ. б. нигеҙенә королған эш алымы, тәртип, кыланыш. *Үҙбелдеклелек күрһәтеү.*

**ҮҘБЕЛДЕКЛӘНЕҮ** *к.* Кеше менән иҫәпләшмәй, үҙең белгән булып эш итеү. *Үҙбелдекләнеп, кешенән кәңәш һорамай.*

**ҮҘБИЛДӘЛӘНЕШ** *и. кит.* Халыктың милли һәм дәүләт төҙөлөшөнә карата үҙ ихтыярын белдереүе. *Милләттәрҙең үҙбилдәләнеш хокуғы.*

**ҮҘГӘ** *с. иҫк.* Бүтән, башка. *Кыш буйы түбәгә төкөрөп ятыуҙан үҙгә эш тә юк.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҮҘГӘЛЕК** *и. һир.* Үҙенә бер төрлө сифат; башҡа бер төрлөлөк; үҙенсәлек. *Уның [атайымдың] эскәрәк батып торған ҡыҫыҡ ҡара күҙҙәрендә, йыйырсыҡланып торған йөҙҙәрендә әллә ниндәй үҙгәлек бар ине.* Д. Юлтый. *Һуңғы көндәрҙә шау-шыулы ҡала тормошо мине ҡыҫа, ситкә тибә, күңел үҙгәлек теләй башланы.* И. Насыри.

**ҮҘГӘЛЕКЛЕ** *с. һир.* Үҙенә башҡа бер төрлө; үҙенсәлекле. *«Һинең башҡаларҙан үҙгәлекле булырға ынтылыуың беҙгә яңылыҡ түгел инде, әсәй»,—тине ун өс йәшлек Салауат.* М. Садиҡова.

**ҮҘГӘЛЕКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Үҙгәлеклегә әйләнеү, үҙгәлекле булыу; үҙгәләнеү. *Үҙгәлекләнеп китеү.*

**ҮҘГӘЛӘНЕҮ** *ҡ. һир.* Үҙгәгә әйләнеү, үҙгә булыу; үҙгәреү. *Уның да [Тимеркәйҙең] хәҙер инде ҡыҙҙар күрһә, күңеле үҙгәләнә.* Д. Юлтый.

**ҮҘГӘЛӘҮ** *ҡ. һир.* Ниндәйҙер үҙгәргән нәмәне ят итеү. *Аш үҙгәләү. Урын үҙгәләп, йоҡлай алмай ятыу.*

**ҮҘГӘРГӘН** *и. диал. ҡар.* **ҡаҫмаҡ** 2.

**ҮҘГӘРЕҮ** [1] *ҡ.* **1.** Башҡа бер төрлөгә, икенсе төрлөгә әйләнеү. *Танымаҫлыҡ булып үҙгәреү. Тормош үҙгәрә. Кешенең төҫө үҙгәрә.* ■ *Элекке Гөлниса түгел инде был хәҙер. Шул хәтле лә кеше үҙгәрер икән.* З. Биишева. *Заманалар ҡалай үҙгәрә: элекке хан хәҙер ишек төбөндә тора, элекке ҡол тәхеттә ултыра* (Әкиәттән).

**2.** *грам.* Килеш, заман, зат, һан ялғауҙарын ҡабул итеү. *Килеш менән үҙгәреү. Һан менән үҙгәреү.*

**ҮҘГӘРЕҮ** [2] *ҡ. диал. ҡар.* **ҡаҫмаҡланыу** 1.

**ҮҘГӘРЕШ** *и.* **1.** Башҡа төрлөгә, икенсе төрлөгә әйләнгән күренеш йәки хәл. *Сырайҙағы үҙгәреш. Тормоштағы үҙгәреш. Үҙгәреш индереү.* ■ *Граждандар һуғышы бөтөп етмәгән. Бөйөк үҙгәрештең бөтә тауышы, бөтә шәүләһе, бөтә гөрөлдәүе Айбулаттың тыуған илендә лә сағыла.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡадирҙа ҡапыл ниндәйҙер гәжәп үҙгәреш башланды: уны күреп булмай, кино йәки театрға саҡырыуҙары онотолдо. Әйтерһең, Фатиманан каса ул.* Б. Бикбай.

**2.** *грам.* Исемдәрҙең төрлө һан, килеш, ҡылымдарҙың төрлө зат, һан һәм заман менән үҙгәргәнен күрһәткән төрләнеш. *Исемдәрҙең зат менән үҙгәреше.*

**ҮҘГӘРЕШЛЕ** *с.* Үҙгәреп, алмашланып тороусан. *Үҙгәрешле ритм. Үҙгәрешле ток. Үҙгәрешле дәүмәл. Үҙгәрешле һан.*

**ҮҘГӘРЕШҺЕҘ** *с.* Сифаты, күләме даими булған. *Үҙгәрешһеҙ ток. Үҙгәрешһеҙ дәүмәл. Үҙгәрешһеҙ һан.*

**ҮҘГӘРТЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **үҙгәртеү**. *Үҙгәртелгән нәмә.*

**ҮҘГӘРТЕҮ** *ҡ.* **1.** Башҡа төрлөгә, икенсе төрлөгә әйләндереү, башҡа төрлө итеү. *Донъяны үҙгәртеү. Исемде үҙгәртеү. Тормошто үҙгәртеп ҡороу. Төҫтө үҙгәртеү. Килеш менән үҙгәртеү.* ■ *Ул [Захаров] команда биргән саҡта үҙенең тауышын үҙгәртергә, офицер тауышына оҡшатырға тырыша.* Д. Юлтый. *Беҙ шоңҡарҙар инек, лагерь үттек һәм үҙгәрттек Балтик ағышын.* Ғ. Сәләм.

**2.** *грам.* Килеш, заман, зат, һан ялғауҙарын ҡушыу. *Ҡылымдарҙы зат менән үҙгәртеү.*

**ҮҘГӘРТТЕРЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **үҙгәртеү**. *Кешенең исемен үҙгәрттереү.*

**ҮҘЕМСЕ** *с. һөйл.* Үҙен генә ҡайғыртыусан. ● *Үҙемсе кеше үлемдән ҡурҡыр.* Әйтем.

**ҮҘЕМСЕЛӘҮ** *ҡ. һөйл.* Үҙеңде генә ҡайғыртыу.

**ҮҘЕНЕКЕ** *и. һөйл.* Быума. *Үҙенеке тотҡан.* ♦ **Үҙенеке ҡушылыу** аҡылға еңеләйеү.

**ҮҘЕНСӘЛЕК** *и.* Бер нәмәнең йәки кешенең үҙенә генә хас сифаты. *Милли үҙенсәлек. Шәхси үҙенсәлек.* ■ *Мәксүттең тағы бер үҙенсәлеге бар әле: ул элек-электән ҡараклыҡ менән дан тотҡан ауыл.* Б. Бикбай.

**ҮҘЕНСӘЛЕКЛЕ** *с.* Үҙенә генә хас сифатлы, үҙенә бер төрлө. *Үҙенсәлекле ижад. Үҙенсәлекле телмәр.* ■ *Өйгә инделәр. Бында бөтә нәмә үҙенсәлекле ине: ишек айыу тиреһе менән көпләнгән, тәҙрәләргә, ишек баштарына һуйыр, ҡор ҡойроҡтары туңәрелтеп ҡуйылған.* Н. Мусин.

**ҮҘЕНСӘЛӘҮ** *ҡ.* Үҙенсә итеү. *Һәр ҡош үҙенсәләп оя ҡора.* Ҡ. Даян.

**ҮҘЕНӘН-ҮҘЕ** (**үҙемдән-үҙем, үҙеңдән-үҙең** һ. б.) *р.* Сит тәьҫирҙән башҡа, кеше ҡатнашыһан тыш. *Үҙенән-үҙе аңлашыла.* ■ *Бына шунан инде уҡтар ҙа үҙенән-үҙе атыла башлай* (Әкиәттән).

**ҮҘЕР** *и. диал. ҡар.* **күкрәк** 4.

**ҮҘЕШМӘКӘР** *с.* Сәнғәт өлкәһендә профессиянан тыш ижад менән шөғөлләнеүсе. *Үҙешмәкәр артист. Үҙешмәкәр драма түңәрәге. Үҙешмәкәр коллектив. Үҙешмәкәр композитор.*

**ҮҘЕШМӘКӘРЛЕК** *и.* Сәнғәт өлкәһендәге профессиональ булмаған ижади эшмәкәрлек. *Үҙешмәкәрлек түңәрәктәре. Үҙешмәкәрлек менән шөғөлләнеү.*

**ҮҘЙӨРӨШЛӨ** *с. шул уҡ* **үҙе йөрөмәле** (*ҡар.* **йөрөмәле**).

**ҮҘҠИММӘТ** *и. кит.* Нәмәнең үҙенә төшкән хаҡы. *Тауарҙың үҙҡиммәтен кәметеү.* ■ *Себер күмере иң осһоҙ күмер, үҙҡиммәте яғынан ул хатта янар газ менән тиңләшә ала.* М. Хисмәтов.

**ҮҘЛЕ** *с.* Йәбешеп, һуҙылып тороусан; йәбешкәк. *Үҙле балсыҡ. Үҙле ҡамыр.* ■ *Бану тупраҡты ҡулы менән тотоп ҡарай, .. үҙле тупраҡты усында йомарлаштыра ине.* Ә. Вәли.

**ҮҘЛЕГЕНӘН** (**үҙлегемдән, үҙлегеңдән** һ. б.) *р.* **1.** Үҙ алдына, үҙенән-үҙе. *Арала артабан үҙлегенән донъяуи белемдәрҙе өйрәнгән һәм халыҡ мәғрифәтенә хеҙмәт итергә тырышҡан кешеләр ҙә булған.* Ә. Харисов. *[Шакир:] Орлоҡто еткерҙек ҡырҡ процентҡа. Ул бит үҙлегенән етмәгән. Буш бураға шул орлоҡто туплап, кем булһа ла тырышып эшләгән.* С. Ҡудаш.

**2.** Башҡа менән иҫәпләшмәйенсә, башҡаны иҫәпкә алмайынса, үҙең белгән булып. *[Ҡормангазы ағай:] Үҙлегемдән генә ат тотоп ятырға мин малай түгел. Законды аңлайым бәләкәс.* Р. Солтангәрәев.

**ҮҘЛЕГЕНӘН-ҮҘЕ** (**үҙлегемдән-үҙем, үҙлегеңдән-үҙең** һ. б.) *р. ҡар.* **үҙенән-үҙе**. *Күҙҙән йәштәр үҙлегенән-үҙе аға.* Б. Бикбай.

**ҮҘЛЕК** *и. иҫк.* Кем йәки нимәләр төп асылы, сифаты. *Һис тотор хәл юҡ күңелдең теҙгенен,*

*һис белер хәл юк фекерҙең төҙләгән. Бер минутта мең түгел, миллион теләк, белә алмайым ҡай теләктең үҙлеген.* Ш. Бабич.

**ҮҘЛЕ-ҮҘЕ** (**үҙле-үҙем, үҙле-үҙең** һ. б.) *р. диал.* Үҙ алдына, үҙенә башҡа. *Үҙле-үҙең донъя көтөү.* ■ *Егеттәр үҙле-үҙе ҡайҙа етте шунда таралышып ҡасты.* Ж. Кейекбаев.

**ҮҘЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Үҙле хәлгә еткереү, үҙле итеү; һағыҙландырыу. *Ҡамырҙы үҙләндергәнсә баҫыу.*

**ҮҘЛӘНЕҮ** *к.* Үҙле хәлгә килеү, үҙле булыу; һағыҙланыу. *Үҙләнгән ҡамыр.* ■ *Һәр аҙым сиктән тыш ауырлыҡ менән үтелә. Орудиеның тәгәрмәстәре үҙләнгән батҡаҡты киҫеп төшә.* Ә. Харисов.

**ҮҘЛӘШЕҮ** *к.* Өйрәнеп үҙ итеү; күнегеү. *Улар [артистар] менән яҡындан танышып алдым. Спектаклдәр ҡарайым, репетицияларҙа булам, тамам үҙләштем.* Ғ. Минһажев. *Ҡала урамы ла хәҙер башта килгәндәге кеүек ят түгел, беҙ инде уға тулыһы менән үҙләшкән кешеләр.* С. Агиш.

**ҮҘЛӘШТЕРЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **үҙләштереү**.

**ҮҘЛӘШТЕРЕҮ** *к.* **1.** Үҙеңә алыу, үҙеңдеке итеү. *[Ләлә:] Минең Хәмзәм аферист булып сыҡты. .. Ул барлыҡ алтынды, ҡыйбатлы заттарҙы үҙләштереп, .. минән ҡуҙ яҙҙы.* Б. Бикбай.

**2.** Нимәнеңдер айышына төшөнөп, үҙ зиһененә, үҙ тәбиғәтеңә алыу; өйрәнеү. *Дәресте үҙләштереү. Техниканы үҙләштереү.* ■ *М. Ҡулаев беҙҙең быуаттың баштарында үк рус һәм көнбайыш Европа культураларын яҡшы үҙләштергән кеше булған.* Ж. Кейекбаев.

**3.** Эшкәртеп ҡабул итеү; һеңдереү. *Ашҡаҙан аҙыкты үҙләштерә.*

**4.** Хужалыҡ эшмәкәрлегенә индереү. *Яңы ер үҙләштереү.* ■ *Быраулаусылар яңы скважиналарҙы тиҙерәк үҙләштереү өсөн көрәш йәйелдерҙе.* К. Мәргән.

**5.** Эш файҙаһына тотоноу. *Төҙөлөш өсөн бирелгән аҡсаны тулыһынса үҙләштереү.*

**ҮҘ-ҮҘЕН** (**үҙ-үҙемде, үҙ-үҙеңде** һ. б.) *а.* Үҙен үҙе, үҙеңде үҙең. *Үҙ-үҙеңде онотоу.* ■ *«Үҙ-үҙеңде алдама, һөнәрсе!..»* З. Биишева.

**ҮҘ-ҮҘЕНӘ** (**үҙ-үҙемә, үҙ-үҙеңә** һ. б.) *а.* Үҙенә үҙе, үҙеңә үҙең. *Үҙ-үҙеңә ышаныу.* ■ *Биктимер [ағаларына] бер һүҙ ҙә әйтмәй: «Мин эшләгән эште эшләһәгеҙ, өс көн, өс төн йоҡлар инегеҙ әле»,— ти үҙ-үҙенә* (Әкиәттән).

**ҮҘ-ҮҘЕНӘН** (**үҙ-үҙемдән, үҙ-үҙеңдән** һ. б.) *а.* Үҙенән үҙе, үҙеңдән үҙең. *Үҙ-үҙеңдән кәнәғәт булыу.*

● *Ит үҙ-үҙенән ҡортлар.* Мәҡәл.

**ҮҘ-ҮҘЛЕГЕНӘН** (**үҙ-үҙлегемдән, үҙ-үҙлегеңдән** һ. б.) *р.* Үҙенән үҙе. *Үҙ-үҙлегенән көйәләнеп йөрөй.*

**ҮҘҺЕНЕҮ** *к.* Үҙ күреү, үҙ итеү. *Ошо ҡылтайып барғанлығы өсөн үҙһенеп етмәйбеҙ Ҡасимды.* Ф. Иҫәнғолов. *[Мәҙинә:] Ниңә ул [әсәйем] һине үҙһенмәй икән? [Харис:] Кейәүе булғас, үҙһенер әле.* Ш. Янбаев.

**ҮҘҺҮҘЛЕ** *с.* Үҙ һүҙен һүҙ итергә тырышҡан; еңмеш. *Хәсби апай бик үҙһүҙле кеше ине. Бара торғас, хәҙерҙән үк бер арба гөшөргә фатиха ҡылдырып ҡуйыурға Ғәйни ағайҙы ҡыҫтай башланы.* Т. Йәнәби. *Морат менән .. пионер вожатыйы ла һөйләшеп ҡараны. Тик үҙһүҙле малайҙы бер кем дә еңә алманы.* И. Ниғмәтуллин.

**ҮҘҺҮҘЛЕЛЕК** *и.* Үҙ һүҙен һүҙ итергә тырышҡан кешегә хас сифат. *Кәбиров менән Арыҙбаева үҙһүҙлелектәре менән уның [Аҡназаровтың] теңкәһенә тейҙе.* Ә. Вәли.

**ҮҘҺҮҘЛӘНЕҮ** *к.* Үҙ һүҙеңде һүҙ итергә тырышыу, үҙһүҙлегә әйләнеү; еңмешләнеү. *[Рәшиҙә:] Һеҙ, Сәғиҙә Хәсәновна, үтә үҙһүҙләнеп, мин-минлеккә бараһығыҙ.* М. Тажи. *Мәктәптәге кеүек үҙһүҙләнергә бында [фермала] мәктәп түгел шул. Һүҙҙе һүҙ итеү өсөн беләк тә, йөрәк тә кәрәк бит әле.* И. Ғиззәтуллин.

**ҮҘӘК** *и.* **1.** Ағас һәм башҡа үҫемлек һабағының иң уртаһынан буйҙан-буй үткән йомшағыраҡ өлөш. *Ағастың үҙәге. Үләндең үҙәге.* / Ниҙең дә булһа иң уртаһында булған йәки иң уртаһынан үткән эске өлөшө. *Алманың үҙәге. Бойҙайҙың үҙәгенән генә тартылған он.*

**2.** Ниҙең дә булһа уртаһынан һабаҡ һымаҡ булып үткән өлөш. *Кәбеҫтәнең үҙәге. Шешектең үҙәге. Үҙәкле сиҡан.* / Әйләнмәле нәмәнең уртаһындағы һап йәки күсәр. *Тешле тәгәрмәстең үҙәге. Ҡул тирмәненең үҙәге.* ■ *— Ҡара ат менән күк бейәне парларға, тимер үҙәкле арбаны егергә кәрәк.* Н. Ҡәрип.

**3.** Ниндәйҙер бер нәмәнең йәки майҙандың нәҡ урталығындағы ер һәм нөктә. *Аҡландың үҙәге. Линза үҙәге. Симметрия үҙәге. // Үҙәк нөктә.* ■ *Сәсәккәйҙәр гөлдөң һабағында осоп китер төҫлө торалар, ҡыҙыл нурҙар балҡый үҙәгендә, бигерәк нурлы, ҡыҙыл шул улар.* Ш. Бабич. *Етер, беҙҙекеләр подвалдарҙа күп интекте, бик күп серене. Яҡты һәм мул тормош төҙөү өсөн үҙәк урамдарға күстек беҙ.* Ғ. Сәләм. / *күсм.* Ниҙеңдер төп асылын, төп сифатын билдәләгән өлөшө. *// Үҙәк бурыс. Үҙәк мәсьәлә.* ■ *Чапаев дивизияһында Ырғыҙ-Кәмәлек буйының ярлы башҡорттары ла һуғыша. Һуңынан улар айырым башҡорт дивизияһының үҙәген тәшкил итә.* М. Минһажетдинов. *«Һуғыш ҡасан бөтә? Ерҙе байҙарҙан ҡасан тартып алып бирәләр?» — тигән һүҙҙәр һүҙ үҙәге булды.* А. Таһиров.

**4.** Миҙгел йәки эш-хәлдең урталығын билдәләгән мәл. *Ҡыш үҙәге. Эш үҙәге.* ■ *Көн үҙәгендә ҡояш апаруҡ йылыта, ләкин .. тын ҡурғыс эҫе бөркә алмай.* Н. Мусин.

**5.** Административ-хужалыҡ өлкәһенең етәкселеге йәки төп көсө тупланған урын. *Ҡолсора — район үҙәге — Ҡайынлы ауылынан ун километрҙа. Элек унда волость ине.* Б. Бикбай. / Ниндәйҙер эш-хәрәкәт селтәренең эшмәкәрлеген тәьмин иткән төп нөктә. *Баш мейеһенең һулыш үҙәге. Фәнни үҙәк. Элемтә үҙәге.* / Үҙәк башҡарма комитеты. *Үҙәк власть. Үҙәк газета. Үҙәк архив. Үҙәк усадьба.*

**6.** Ике тау араһындағы тәрән уй. *Урал тауының араһындағы текә соҡорҙар, тәрән үҙәктәрҙән тау башына табан үрелә.* Ғ. Дәүләтшин. *Алдан барған колонна, юлдан сығып, ике сопка араһындағы тәрән үҙәккә боролдо.* С. Ҡулибай.

**7.** *күсм.* Эске булмыш, йән. *Үҙәккә тейеү.* **Үҙәккә үтеү** 1) нытҡ әрнетеү. *Иптәштәрҙең һүҙе [Әфтәховтың] үҙәгенә үтте.* С. Агиш; 2) ныҡ йон-

сотоу, биҙрәтеү. *Уҙған ғүмеремдең аҙаптары үҙәгемә үткән шул кәҙәр.* Ғ. Мәсғүт.

8. *диал.* Күсәр.

♦ **Арҡа үҙәге** *шул ук* **арҡа һабағы** (*кар.* **арҡа**). **Иғтибар үҙәгендә булыу** *кар.* **иғтибар. Үҙәк көйөү** ашҡаҙандан килгән эселектән ҡыҙыл үңәстең әрнеүе; һарыу ҡайнау. **Үҙәк өҙгөс** *кар.* **өҙгөс** [1]. **Үҙәкте өҙөү** *шул ук* **йөрәкте өҙөү** (*кар.* **йөрәк**). **Үҙәк тартыу** тынды үҙәккә алыу. *Үҙәк тартып илау.* **Үҙәк ялғау** *шул ук* **тамаҡ ялғау** (*кар.* **тамаҡ**).

**ҮҘӘКЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Үҙәклегә әйләнеү, үҙәкле булыу. *Сиҡанды үҙәкләнгәс кенә һытырға ярай.*

2. *диал.* Ҡапҡылау.

**ҮҘӘКЛӘТЕҮ** *к.* Үҙәк буйынан буйлатыу. *Көтөүҙе үҙәкләтеп ҡыуыу.*

**ҮҘӘКЛӘҮ** *к.* Үҙәк буйынан буйлау. *Үҙәкләп барыу.* ■ *Ҡайҙалыр ҡысҡырған көтөүсе тауышы соҡор үҙәкләп, .. аҙ ғына ла көсөн кәметмәй, түбән йүгерҙе.* И. Насыри.

**ҮҘӘКЛӘШЕҮ** *к.* Бер үҙәккә (5 мәғ.) ойошоу; тупланыу. *Үҙәкләшкән дәүләт. Үҙәкләшкән етәкселек.*

**ҮҘӘКЛӘШТЕРЕҮ** *к.* Бер үҙәккә (5 мәғ.) ойоштороу; туплау. *Эште үҙәкләштереү. Идараны үҙәкләштереү.*

**ҮҘӘКҺЕРӘҮ** *к. диал.* Асығыу. *Тамағынан аш үтмәй, үҙәкһерәп үлде.*

**ҮҘӘН** *и.* Һыу аҡҡан йырын, һыу юлы. *Иҫке үҙән. Яңы үҙән. Киң үҙән. Тәрән үҙән.* ■ *Элек был үҙәндән һыу аға торғайны.* Ж. Кейекбаев. *Аға һыуҙар — бурълығы ла, таҙаһы ла бер үҙәндән.* Р. Аҙнағолов. / Йылғаның ике яғынан һыҙылған түбән ер; йылға буйы. *Үҙән буйы.* ■ *Йүгереп кенә мендем ай үҙәндән таҡыя ла башлы ҡурайға* (Халыҡ йырынан).

● *Үҙәндең күрке тал булыр, айғырҙың күрке ял булыр.* Әйтем.

**ҮЖӘТ** [1] *с. диал.* Үҙһүҙле, еңмеш. *Үжәт кеше.*

**ҮЖӘТ** [2] *с. диал.* Ялҡау.

**ҮЖӘТЛӘНЕҮ** [1] *к. диал.* Үҙһүҙләнеү, еңмешләнеү. *Үжәтләнеп эшләү.*

**ҮЖӘТЛӘНЕҮ** [2] *к. диал.* Ялҡауланыу.

**ҮЗБӘК** *и.* Үзбәкстаның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (төрки телдәренең береһендә һөйләшә). *Үзбәк халҡы. Үзбәк теле. Үзбәк йыры. Үзбәк ҡыҙы.*

**ҮЗБӘКСӘ** *р.* **1.** Үзбәк телендә. *Үзбәксә белеү. Үзбәксә һөйләшеү.*

2. Үзбәк халҡына хас, үзбәктәр кеүек. *Үзбәксә кейенеү.*

**ҮЗӘР** *и. иҫк. кит.* Өҫ. *Ер үзәре.*

**ҮК** *киҫ. кар.* **уҡ** [2].

**ҮКЕЛ** *и. этн.* **1.** *кар.* **моронҙоҡ** [3]. *Үкел атай. Үкел әсәй. Үкел ҡыҙ. Үкел кейәү.*

2. Баланы үҙ ата-әсәһенә «һатып» биргән кеше (балалары тормаған кешеләр үҙ балаһын хаҡ биреп, икенсе ғаиләнән тәҙрә аша һатып алғанда).

**ҮКЕЛДӘҮ** *к.* Үк-үк итеп ҡысҡырыу (ябалаҡҡа ҡарата). *Ябалаҡ үкелдәй.*

**ҮКЕЛДӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **үкелдәү.**

**ҮКЕМ** *с. диал.* Сыҙамлы. *Эшкә үкем.*

**ҮКЕМҺЕҘЛӘҮ** *к. диал.* Бимазалау, борсоу.

**ҮКЕНДЕРЕҮ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **үкенеү.** *Хата аҙаҡ үкендерә оҙаҡ.* М. Хәй.

2. *эйһ. ф. кар.* **үкенеү.** *Шулай ҙа, Хәйҙәр, әҙерәк үкендерә шул, ташлап китеүе әллә нисегерәк булып тора, йәл кеүек.* М. Тажи.

**ҮКЕНЕС** *и.* Үкенеү тойғоһо. *Үкенес белдереү. Үкенескә калыу.* ■ *Бәндәләргә үкенестәр биреп, ғүмер шулай үтеп китәләр.* Ҡ. Даян. *Үтәр көнгә, дуҫтар, үкенес юҡ, йырлайым тик шатлыҡ турында.* Ғ. Амантай.

♦ **Үкенескә ҡаршы** *инш.* үкенес белдергәндә әйтелә. *Эйе, кабатланмаҫ тәүге мөхәббәт тойғолары ине былар. Ләкин, үкенескә ҡаршы, был гүзәл тойғо япраҡ ярырға ла, сәскәләнергә лә өлгөрмәне шул.* З. Биишева.

**ҮКЕНЕСЛЕ** *с.* Үкенеү тойғоһо уятҡан. *Үкенесле донъя. Үкенесле ғүмер.* // *Көн үкенесле үтте.* ■ *Балалар уйнай, ә ҡарттар уларҙың шат йөҙөнә ҡарап, үҙҙәренең үкенесле үткән йәшлектәрен уйлап ала.* С. Агиш.

**ҮКЕНЕСҺЕҘ** *с.* Үкенеү хисе уятмаған. *Үкенесһеҙ эш.*

**ҮКЕНЕҮ** *к.* Ниндәйҙер эш-хәлдең булған йәки булмағанына ҡарата йәлләү, бошоноу хисе кисереү. *Уҡымай калғанға үкенеү. Эш боҙғанға үкенеү.* ■ *Ашағы килә, эске килә. Ә беҙ һыу буйында һыу ҙа эсмәгәнбеҙ. Шуға үкенәбеҙ.* Д. Юлтый. *[Зөһрә:] Гөлнур тупаҫ, тибеҙ. Ләкин һуңынан тупаҫлығы өсөн үкенә, уны ул тәрән кисерә.* Р. Ниғмәти. *Йөрәктә лә гелән генә гөл, сәскәле яҙ булманы. Терһәкте тешләрҙәй булып үкенеүҙәрем аҙ булманы.* А. Игебаев.

● *Кеше атына менмә, менһәң — үкенмә.* Әйтем.

**ҮКЕНЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **үкенеү.**

**ҮКЕРЕҮ** *к.* **1.** Ҡалын, яман тауыш менән һуҙып ҡысҡырыу. *Арыҫлан үкерә. Үгеҙ үкерә.* ■ *Ер йыртып үкереп, төтөн еҫенә сәсәп, тыны ҡурылып, тайыш табан килеп сыҡты.* С. Кулибай. *Паровоз урман яңғыратып бер үкерҙе лә аҡрын ғына ҡуҙғалып китте.* Т. Йәнәби. / Йәмһеҙ итеп ҡысҡырыу (кешегә ҡарата); аҡырыу. *Үкереп ебәреү.* ■ *Ул [крәҫтиән] үкәреп илай, зарын һөйләй.* Д. Юлтый. *Лотфа ағай екереп: «Бында һине ашатып, эсереп тороуы бик еңел эш түгел. Яҡшы булһаң атайың әсәйең вафат булмаҫ ине!» — тип, ҡаты-ҡаты әйткәс, Мәрйәм, сыҙай алмай, үкереп илап ебәрҙе.* М. Ғафури.

2. *кусм.* Бик көслө, яман олоған тауыш сығарыу; геүләү. *Диңгеҙ үкерә. Ел үкерә.* ■ *Тулҡын һикерә, көслө тулҡын үкерә.* М. Кәрим.

♦ **Үкереп үҫеү** күкрәп үҫеү; уңыу. *Иген үкереп үҫән.*

**ҮКЕРЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **үкереү.** *Ҡайтып килгәнемдә, ана теге Төлкөскан һыртында яман үкерешкән, шатыр-шотор ағастар һынған тауыш ишетеп калдым.* Н. Мусин.

**ҮКЕРТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **үкереү.** *Үкертеп гармун уйнау.* ■ *Яҙғы һыуҙа яланаяҡ йөрөй торғас, бөтә балтырҙарым ярылған, кайһы урындарынан кандар сығып тора, кис булдымы — үкертеп һыҙлай башлай.* Д. Юлтый. *Ҡыҙҙарының гәйеп булғанын белеп, батша уландарын үкертә башлаған* (Әкиәттән).

♦ **Үкертеп эшләү** бик шәп, ҡыҙыу эшләү; емертеп эшләү.

**ҮКСӘ** *и.* **1.** Аяҡтың бәкәлдән түбәнге артҡы өлөшө. *Үксә һөйәге. Үксәне өйкәтеү.* ■ *Үҙҙәре төшкөләккә түкталған әлеге урманға инеп, саҡ ҡына барғас та [Күсәрбаев] һул аяғының үксәһе ҡыра башлағанды һиҙҙе.* Д. Исламов. / Аяҡ кейеменең шул өлөшкә тура килгән ере. *Ойоҡ үксәһе. Ҡатаның үксәһенә баҫыу.* ■ *[Яланбикәнең] аяғында үксәһе тишелгән йөн ойоҡ.* Һ. Дәүләтшина. **Бағана үксә** бер рәте тоташ, икенсе рәте күҙ аша бәйләнгән ойоҡ үксәһе. **Ҡаҙаҡ үксә** күҙ аша алып бәйләнгән ойоҡ үксәһе. **Ыңғай үксә** шәл уртаһы һымаҡ итеп бәйләнгән ойоҡ үксәһе.

**2.** Аяҡ кейеме табанының артҡы яғына бейегәйтеп ҡуйған нәмә; күтәрмә. *Бейек үксә. Тәпәшәк үксә. Осло үксә. Үксәһеҙ сарыҡ.* ■ *Кисәгә иң яҡшы күлдәген, бейек үксәле, ҡара лаклы босоножкаһын кейеп килгән Иркә һәр кемдең иғтибарын үҙенә тартырлыҡ һылыу ине.* Ә. Вәли. *Зәлифәкәй кейгән ҡара итек уның үксәләрен тар итеп* (Халыҡ йырынан).

◆ **Үксәгә баҫыу** арттан ҡалмай ҡыҫрыҡлау. *Ғаббас ҡайнаға ла шулайырак ҡылана, үксәгә баҫып, сыбырткылап ҡына йөрөй.* М. Тажи. **Үксә күтәреү** (*йәки* **ялтыратыу**) тиҙ генә китеү; ҡасыу. *[Бай бисәһе:] Үксәңде күтәр, .. сығып кит, күҙәмә күренмә, хәйерсе.* Д. Юлтый. **Үксән артҡа киткән** әкрен ҡуҙғалыусан, ығыш кешене әрләп әйтелә. *Бәләкәй ҡуҙғалыбыраҡ, аяҡты ҡапылыраҡ алып атлап булмаймы, үксәң артҡа киткән!* Т. Хәйбуллин. **Үксәһе ергә теймәй** бик шәп йүгереүгә ҡарата әйтелә.

**ҮКСӘЛӘП** *р.* Аяҡты үксәгә ҡуйып, үксәгә терәп. *Уның [Нәзифәнең] эргәһенән үткәндә, [һөйөнөс] күҙен ҡырын ғына төшөрөп, алама итеген шығырлатып, үксәләп баҫырға тырышҡан.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҮКТӘҮ** *к. диал.* Сығынлау. *Ат үктәй.*

**ҮК-ҮК** *ОКШ.* Ябалаҡ тауышын белдергән һүҙ. *Үк-үк итеү. Үк-үк килеү.*

**ҮКҺЕҘ** *с.* Ата-әсәһе булмаған, атаһыҙ һәм әсәһеҙ. *Үкһеҙ бала. Үкһеҙ йәтим. // Үкһеҙ ҡалыу.* ■ *[Ғәли:] Мин ун ике йәшемдә саҡта, атай ҙа, әсәй ҙә үлеп, үкһеҙ йәтим булып ҡалдым.* М. Ғафури. *Йәтим үҫте ул [Фәтих]. Ә юҡ, йәтим тип ни, бөтөнләй үк үкһеҙ йәтим түгел, ярты йәтим, йәғни әсәһе менән генә.* К. Мәргән. *Морон төртөр ер юҡ ине, үкһеҙ инек көлләбөҙ ҙә.* А. Игебаев.

**ҮКҺЕТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **үкһеү.** *Ҡара төнөм аҡ уй менән уҙҙы, үкһетһә лә мине үткәндәр.* Т. Йосопов.

**ҮКҺЕҮ** *к.* **1.** Ныҡ әрнегән, ныҡ әсенгән тауыш менән ярһыу. *Үкһеп илау.* ■ *Күпме ҡыйын күреп, күпме ваййым, үкһеп-үкһеп өҙөлөп иланыҡ.* Ш. Бабич. *Мин ауылдан киткән сағымда үкһей-үкһей әсәй оҙата килде.* М. Кәрим.

**2.** Ярһып, оңҡолдаған тауыш сығарыу (малға ҡарата). *Өйөр башының асыуланып үкһегән тауышы .. бөтә өйөрҙө бер ергә туплаған* (Хикәйәттән).

**ҮКҺӘМЛӘҮ** *к. диал.* Үкһәү [1].

**ҮКҺӘҮ** [1] *к.* Үгеҙ теләү, үгеҙ һорау. *Үкһәгән һыйыр.*

**ҮКҺӘҮ** [2] *с. диал.* Күкһәү.

**ҮКӘЛЕҮ** *к. диал. ҡар.* **бәйләнеү** 6. *[Мораҙым:] һинең быны ошо иҫке замандан килгән шаҡшың үкәлде миңә.* Ғ. Әмири.

**ҮКӘН-ТҮКӘН** *и. диал.* Әкәм-төкәм.

**ҮЛЕ** *с.* **1.** Тере булмаған, үлгән, йәнһеҙ; *киреһе* тере. *Үле балыҡ. Үле кәүҙә. Үле тыуыу.* ■ *Зөләйханың ике ағаһының да үле хәбәре килә.* Ф. Рәхимғолова. // *[Һатыусы малайҙары:] «Беҙҙең үлене терелтә, терене үлтерә торған дарыуыбыҙ бар»,— тип губернаторҙың үлеп ятҡан ҡыҙы янына бара* (Әкиәттән). / *күсм.* Хис-тойғонан, дәрт, илһамдан мәхрүм. *Үле йөрәк.*

**2.** Үҫемлек, тереклектән мәхрүм; буш. *Үле дала.*

**3.** Бүленеп ҡалған, аҡмаған. *Үле йылға. Үле һыу.*

◆ **Ни үле, ни тере түгел** ныҡ ҡурҡып, ҡатып ҡалған хәлгә ҡарата әйтелә. *Кәзәбеҙ, меҫкен, ни үле, ни тере түгел, ҡурҡышынан тауыштан яҙған.* С. Кулибай. **Үле күмер** уты бөткән, һүнгән күмер. *[Емеш] мейестә тумарлап ятҡан үле күмерҙәрҙе берәм-берәм тотоп ҡарап, йомшаҡ йүкә күмерен эҙләп алды.* З. Биишева. **Үле тимер** эшкәртелмәгән ҡара тимер. **Үле һөт** *ҡар.* **һөт** 1.

**ҮЛЕК** *и.* **1.** Үлгән кешенең кәүҙәһе; мәйет. *Үлекте күмеү. // Үлек кәүҙә.* ■ *Үлек эҫегә ылбырап бөткәнгә күрә, йыуып күмеү мөмкин түгеллеге тураһында кәңәшләшеләр ҙә шулай ғына күмергә булдылар.* Һ. Дәүләтшина. *Таш йорт аҫты — һалҡын подвалдан ярым үлек эшселәр сыҡҡандар.* Ғ. Хәйри. *Диңгеҙ өҫтө ҡып-ҡыҙыл ҡан, әркелеп үлек аға: ирҙәр үлә, башын һала, мәңгелек даны ҡала* (Бәйеттән).

**2.** *һөйл.* Шешеккә, яраға йыйылған боҙоҡ һыу; эрен. *Үлек йыйыу.*

**ҮЛЕКЛӘҮ** *к. һөйл.* Эрен менән тулыу. *Шешек үлекләй. Бармағы үлекләгән.*

**ҮЛЕМ** *и.* Йән эйәләренең тереклек итеүҙән туҡтаған хәле; үле хәл. *Һәләкәтле үлем. Үлем ғазабы. Үлем ҡурҡынысы. Үлем язаһы. Үлемгә хөкөм итеү. Үлемдән ҡалыу.* ■ *Бала үлеме әсәнең йөрәгенә тағы ла тәрәнерәк яра һалып ҡалдырҙы. Уның йәшәү менән үлем тартышҡан минуттарҙа ла атаһын телгә алып һөйләнеүе әсәнең ҡолаҡ төбөнән китмәне.* М. Тажи. *Үлемде һуғышта һәр минут көтәһең.* Д. Юлтый. **Аңһыҙ үлем** тәбиғи булмаған, ауырымайынса ҡапыл булған үлем.

◆ **Үлем менән бер** *йәки* **үлемең дә кәрәкмәй** бик ҡыйын хәлгә ҡалғанда әйтелә. *Гөлйөҙөм ошо һөйләшкәнде шаршау артынан тыңлап торған булһа — үлемең дә кәрәкмәй.* Һ. Дәүләтшииа. *Өйҙә эшһеҙ ултырыу Зыяға үлем менән бер ине.* М. Тажи. **Үлем тағарағы** *ҡар.* **тағараҡ** 1. **Үлем хаҡ менән** күп ыҙалыҡ менән; көс-хәлгә. *Үлем хаҡ менән ҡара томандан килеп сыҡтыҡ.* **Үлем һалыу** бөтә көстө биреү. *Үлем һалып ҡысҡырыу. Үлем һалып тырышыу.*

**ҮЛЕМЕСЛЕ** *с.* **1.** Үлем ҡурҡынысы һалған, үлем килтерерлек; һәләкәтле. *Үлемесле һуғыш. Үлемесле яра. // Үлемесле алышыу. Үлемесле яраланыу.* ■ *Үлемесле яуҙар ялҡынынан алһыуланып көткән таң атты.* С. Ғәбиҙуллин.

һәләкәткә килтерә торған, һәләкәт ҡурҡынысы һалған. *Үлемесле көрәш. Үлемесле ҡурҡыныс.*

**2.** *һөйл.* Үлем хәленә етерлек. *Үлемесле бошонҡолоҡ. Үлемесле булып арыу.*

**ҮЛЕМ-ЕТЕМ** *и. йыйн.* Төрлө үлем һәм һәләкәт. *Үлем-етем арҡаһында халыҡтың һаны кәмегән.*

**ҮЛЕМЛЕК** *и.* Үлгәс, ерләгәндә кәрәк буласаҡ төрлө нәмә. *Үлемлек йыйыу. Үлемлек әҙерләү.*

**ҮЛЕМЛӘШЕҮ** *к.* Үлә яҙып ныҡышыу; көсләшеү. *[Эткол:] Былтыр һин һайланһын тип үлемләшеп ҡыҙыл ауыҙҙар менән ең-яға талашыуым бушҡа ғына ине тип беләһеңме әллә?* Ғ. Дәүләтшин.

**ҮЛЕМҺЕҘ** *с.* **1.** Бер ваҡытта ла үлмәй, юҡҡа сыҡмай торған; мәңгелек. *Үлемһеҙ мөхәббәт. Үлемһеҙ булыу.* ■ *Донъяла юҡ бүтән үлемһеҙ йән, хаҡлыҡ өсөн үлгән батырҙай.* З. Биишева.

**2.** *юғар.* Бер ваҡытта ла онотолмай, иҫкермәй торған; мәңгелек. *Үлемһеҙ йыр. Үлемһеҙ әҫәр.*

**ҮЛЕМҺЕҘЛЕК** *и. юғар.* Үлгәндән һуңғы мәңге онотолмаҫ дан. *Уның [Аҡмулланың] кәбергә һыймаҫлыҡ даны үлемһеҙлеккә әйләнә.* С. Ҡудаш.

**ҮЛЕМҺЕРӘҮ** *к.* Йәшәге килмәй, үлем теләү. *[Көнһылыу — атаһына:] Үлемһерәгән күңелем, .. Байғубәгем тере булмағас* (Хикәйәттән).

**ҮЛЕҮ** *к.* **1.** Тереклек итеүҙән, йәшәүҙән туҡтау; йән биреү. *Үлгән кеше. Үлгән мал. Үлеп китеү. Үлер сиккә етеү. Астан үлеү. Ауырып үлеү. Ваҡытһыҙ үлеү.* ■ *«Ленин үлде...» — тиҙәр. Юҡ, үлмәне! Ул бөгөн дә беҙҙең арала.* Х. Кәрим. **Шәһит** үлеү ниндәйҙер изге маҡсат хаҡына баш һалыу; ҡорбан булыу. *Күк ыласындың балаһы бауҙа үлә талпынып, яҡшы атаның балаһы шәһит үлә, яу йөрөп.* Салауат Юлаев. / Ҡан әйләнеше боҙолоу сәбәпле үле хәлгә килеү (тән туҡымаларына ҡарата). *Үлгән ит.* / *күсм.* Хис-тойғо, дәрт, илһамдан мәхрүм булыу. *Үлгән йөрәк. Үлгән йән.*

**2.** *күсм.* Юҡҡа сығыу; бөтөү. *Бейек тауҙың үлгәне — башын монар алғаны; ай менән көндөң үлгәне — тонйорап байып барғаны; ҡара ерҙең үлгәне — ҡар аҫтында ҡалғаны* (Ҡобайырҙан).

**3.** *күсм.* Бик ныҡ яратыу, йәнендә бирергә әҙер булыу. *Бала өсөн үлеү. Йыр тип үлеү. Эш тип үлеү.* ■ *Сөнки мин һеҙ тип йәшәйем, һеҙ тип көләм, һеҙ тип үләм.* Ш. Бабич. **Үлеп барыу** (*йәки* **тороу**) ныҡ ҡәҙер, хөрмәт итеү; өҙгәләнеү. *Кеше өсөн үлеп бара. Ҡунаҡ тип үлеп бара.* / Ныҡ эсенеү, ныҡ әрнеү. ■ *Naҙлы сәсәккәйҙәр, меҫкенкәйҙәр, һокланһам да һеҙҙе ҡыҙғанам, бик аҙ көндән шиңеп бөтәһегеҙ, шуның өсөн үләм, һыҙланам.* Ш. Бабич.

**4.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында килеп, төп ҡылымдың мәғәнәһен көсәйтеү өсөн ҡулланыла. *Үлеп ғашиҡ булыу. Үлеп йоҡлау. Үлеп көнләшеү. Үлеп һағыныу.* ■ *Элек халыҡ елкәһен кимереп, ал да гөл йәшәгән мулла-монтағайҙар һәм ҡулаҡтар үлеп яратмай ине ярлыларҙы.* Н. Иҙелбай.

♦ **Үлеп терелеү** бик ауыр хәлдән сыҡҡанда әйтелә. **Ят та үл** *ҡар.* **ятыу** [1].

**ҮЛЕШ** *и.* **1.** Яуҙағы, һуғыштағы һ. б. күмәк үлем. *Аралар ыҙғышы хәҙер генә һүрелә башлаған ул. Революцияға тиклем хатта үлешкә тиклем барып еткәндәр.* Б. Бикбай. *Үлеш бара бында, ҡырыш бара, аҡ ҡарҙарға ҡандар бутала.* Х. Ҡунаҡбай.

**2.** *күсм.* Ҡаты талаш, тартыш. *Киноға инә алманыҡ, билет өсөн үлеш.*

**ҮЛЕШЕҮ** *к. урт. ҡар.* үлеү. *Үлешеп ятыу.* ■ *Кем өсөн ҡырылыштылар, үлештеләр һуң яу яһап?* Т. Йәнәби. *Заятүләктең алты туғаны хан булырға үҙ-ара һуғышып үлешеп бөтә. Бына шунан һуң Дим буйында башҡа хан булмаған.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ҮЛЕШ-ҠЫРЫЛЫШ** *и. йыйн.* Күмәк үлем, ҡырылыш.

**ҮЛМӘҪ** *с. ҡар.* үлемһеҙ. *Үлмәҫ дан. Үлмәҫ исем.*

♦ **Үлмәҫ гөл** ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған, һулымай торған ҡоро сәскәле бер төр үлән исеме.

**ҮЛСӘГЕС** *и.* Ниҙеңдер кимәл, дәүмәлен үлсәй торған прибор йәки ҡорамал. *Көс үлсәгес. Тулҡын үлсәгес. Һыу үлсәгес.*

**ҮЛСӘМ** *и.* **1.** Үлсәү берәмеге. *Ауырлыҡ үлсәмдәре. Метрик үлсәм. Оҙонлоҡ үлсәме. Үлсәмдәр системаһы.*

**2.** Нимәнең дә булһа күләме, дәүмәле, размеры. *Кейем үлсәме. Бәләкәй үлсәмле аяҡ кейеме.*

**3.** Шиғри һәм музыкаль әҫәрҙәрҙәге ижек, ритмик быуын һаны. *Ҡобайыр үлсәме. Оҙон йыр үлсәме. Ритмик үлсәм.*

**4.** *күсм.* Ниҙәлер баһалау йәки берәй нәмә менән сағыштырыу өсөн сама, нигеҙ булып торған нәмә. *Баһалау үлсәме.* ■ *Аңлау өсөн бәхет тигән төшөнсәне һәр кемдең бар үҙ ҡарашы, үҙ үлсәме.* Х. Сафаров.

♦ **Күҙ үлсәме** күҙ ҡарашы менән тоҫмаллап билдәләнгән күләм. *Малға аҙыҡты күҙ үлсәме менән самалап биреү.*

**ҮЛСӘМЛЕ** *с.* Үлсәп һатыла йәки алына торған. *Үлсәмле он. Үлсәмле шәкәр. Үлсәмле тоҙ.*

**ҮЛСӘМҺЕҘ** *с.* Үлсәмә һатыла йәки алына торған. *Үлсәмһеҙ ашлыҡ.*

**ҮЛСӘНЕҮ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* үлсәү [1]. *Үлсәнгән шәкәр.*

**2.** Үҙеңдең ауырлығыңды үлсәү. *Үлсәнеп ҡарау.*

**ҮЛСӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* үлсәү [1] *Иген үлсәтеү. Шәкәр үлсәтеү.* ■ *Һатыу башланды. Ишектән халыҡ ағыла торҙо. Улар кәрәкле тауарҙы һайлай, үлсәтә, талон яҙҙыра.* С. Агиш.

**ҮЛСӘҮ** [1] *к.* **1.** Һәр төрлө ҡорамал ярҙамында ниҙең дә булһа дәүмәл, миҡдарын билдәләү. *Үлсәү берәмеге. Ауырлыҡты үлсәү. Буйҙы үлсәү. Йылылыҡты үлсәү. Көстө үлсәү. Мөйөштө үлсәү. Оҙонлоҡто үлсәү. Аҙымлап үлсәү. Биҙмән менән үлсәү. Метрлап үлсәү. Мыҫҡаллап үлсәү. Үлсәү менән үлсәү. Үлсәп алыу. Үлсәп биреү. Үлсәп тегеү. Артыҡ үлсәү. Кәм үлсәү. Теүәл үлсәү.* ■ *Сәғәт теле һуға, туҡтай белмәй, тигеҙ үлсәй ваҡыт араһын.* Я. Ҡолмой. *[Уртансы ул:] Мин, атай, төшөмдә гел алтын үлсәнем. Үлсәнем-үлсәнем дә үлсәп бөтөрә алманым* (Әкиәттән).

2. *күсм.* Төрлө яҡтан уйлап самалау. *Үлсәп һөйләү.* ■ *Тикшерҙем, үлсәнем, ысын күрҙем борсолған бригадир хаҡлығын.* Ғ. Сәләм. *[Сынбулатов:] Телең бик әрем, Тәнзилә еңгә. Мин бит уйнап йөрөмәйем, һүҙҙе урыны менән һәм үлсәберәк һөйләргә кәрәк. Шаярыуҙы ҡуйып тор!* М. Тажи.

3. *күсм.* Нимәнелер икенсе бер нәмә менән сағыштырып баһалау. *[Председатель] бөтә колхозды бер ҡалыпҡа кереп бер үлсәү менән үлсәп көн итте.* Н. Ғәлимов. *Үлсәйем мин йөрәгемдә ятҡан тыуған яҡҡа булған һөйөүҙе тәрәнлеге менән Волга һыуҙың, гүзәллеге менән Мәскәүҙең.* Х. Ғиләжев.

♦ **Ташҡа үлсәйем** *кар.* **таш. Үҙ аршынының менән үлсәү** кешенең эш, ҡылығын үҙеңдән сығып баһалау.

● *Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ.* Мәҡәл.

**ҮЛСӘҮ**[2] *и.* **1.** Төрлө нәмәнең ауырлығын билдәләй торған прибор. *Бәләкәй үлсәү. Ҙур үлсәү. Көйәнтәле үлсәү. Ҡул үлсәүе.* ■ *Майгөл менән Баймораt бойҙай ҡабы күтәреп индерә, үлсәүгә һалып үлсәй.* Р. Ниғмәти.

2. *кар.* **үлсәм** 1. *Оҙонлоҡ үлсәүе.*

3. *кар.* **үлсәм** 3. *Шиғыр билдәле бер үлсәүгә ҡорола.*

4. (*баш хәреф менән*) *астр.* Зодиактың береһе (Ҡыҙ һәм Саян йондоҙлоҡтары уртаһында урынлашҡан).

● *Аҡыллы һүҙҙең дә үлсәүе бар.* Әйтем.

**ҮЛСӘҮЕС** *и. кар.* **үлсәгес.**

**ҮЛСӘҮЛЕ** *с.* **1.** *кар.* **үлсәмле.** *Үлсәүле он.*

2. *күсм.* Күләм, дәүмәле сикле; самалы. *Аслыҡ һөйләһәң, үлсәүле аҙыҡты үлсәп ашай башлаһаң, тамаҡ туймай бит ул.* Д. Юлтый.

3. *күсм.* Төрлө яҡлап уйлаулы; төплө. *Емеш касандыр дәү, мөһабәт кәүҙәле, ҡаты, бойороҡло тауышы, үлсәүле тос һүҙҙәре менән игтибарҙы яулап ала торған был ҡатындың йөҙөндә, һүҙендә, хатта таушында ла ҙур үҙгәреш һиҙҙе.* З. Биишева.

**ҮЛСӘҮҺЕҘ** *с.* **1.** *кар.* **үлсәмһеҙ.**

2. *күсм.* Ҙур күләмдә, сикһеҙ күп; самаһыҙ. *Үлсәүһеҙ хыял.*

**ҮЛСӘШЕҮ** *к.* **1.** *урт. ярҙамл. кар.* **үлсәү**[1] 1. *Иген үлсәшеү.*

2. Үҙ-ара буйҙы сағыштырыу. *Һуңғы үлсәшеүҙән һуң өсөбөҙ ҙә байтаҡ ҡына үҫкәнбеҙ булып сыҡты. Әптерәй миңә тиңләшә яҙған, мин — Зарифҡа.* Й. Солтанов.

**ҮЛТЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **үлтереү** 1. *Көндәрҙән бер көн, Бабсаҡтың үлтерелеүенә ете ай тулғанда, Йәмиләнән бер ир бала тыуа.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ҮЛТЕРЕҮ** *к.* **1.** Тереклек итеүҙән, йәшәүҙән туҡтатыу; йәнен алыу. *Атып үлтереү. Үлтереп ташлау. Үлтерә һуғыу. Йәнлекте үлтереү.* ■ *Мин быға тиклем үҙ ҡулым менән себен дә үлтергән кеше түгел бит.* Д. Юлтый.

2. *күсм.* Хис тойғо, дәрт, илһамды юҡ итеү. *Йөрәк тыныслығын үлтерә алырлыҡ көслөмө ни хисе кешенең?!* Ғ. Сәләм.

3. *күсм.* Иҫ-һушты алыу. *Үлтерерлек итеп йылмайыу.* ■ *Сажиҙә шундай ягымлы итеп миңә ҡарай. Был ҡараш мине үлтерә. Йөрәк әллә нишләп китә.* И. Ғиззәтуллин.

4. Хәл ҡылымдын *-а, -п* формаһында килеп, төп ҡылымдың мәғәнәһен көсәйтә. *Үлтереп маҡтау. Үлтерә әйтеү.* ■ *[Тайба әбей — Айһылыуға:] Шәлде һинән дә шәп бәйләүсе юҡ ине. Хәҙер бына беҙҙең Бибеш килен шулай. Үлтереп бәйләй ҙә ҡуя.* З. Биишева.

● *Кеше һүҙе кеше үлтерә.* Мәҡәл.

**ҮЛТЕРЕШ** *и.* Йән ҡыйыш, ҡан ҡойош.

**ҮЛТЕРТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **үлтереү** 1. *Аҡйелекте батша үлтертергә булған* (Әкиәттән).

**ҮЛӘ** *и. диал. кар.* **шүмән**[1].

**ҮЛӘКСЕН** *и. диал.* Үләкһә.

**ҮЛӘКҺӘ** *и.* **1.** Үлеп ятҡан хайуан, ҡош-ҡорт; емдек. *Ат үләкһәһе. Эт үләкһәһе.* // *Үләкһә һыйыр.* ■ *Ишбулды бер киҫкә эргәһендә ятҡан үләкһәне ентекләп ҡарап торҙо.* Ж. Кейекбаев.

2. *күсм.* Үлер-үлмәҫ саҡ ҡуҙғалып йөрөгән йән эйәһенә ҡарата әйтелә. / Хәлһеҙ, кәрһеҙ кешене әрләгәндә әйтелә.

**ҮЛӘМӘТ** *и. диал. кар.* **үләкһә** 2.

**ҮЛӘН** *и.* Йыл һайын яҙынан шытып үҫә торған йәшел үҫемлек. *Бер йыллыҡ үлән. Күп йыллыҡ үлән. Башаҡлы үлән. Бейек үлән. Дарыу үләне. Еҫле үлән. Йәш үлән. Йәшел үлән. Ҡый үләне. Ҡыу үлән. Үләнле ер. Үлән сәсеү.* ■ *Йылға ғына буйы күк үлән, ашап ҡына тора кир дүнән* (Халыҡ йырынан). **Аҡҡойроҡ үләне** эсе ҡыуыш төҙ, нәҙек һабаҡлы, бер төптән сыҡҡан өйкөм аҡһыл башаҡлы, күрәнгә оҡшаш күп йыллыҡ үлән. *Тал араһында аҡҡойроҡ үләненең һирәк кенә һабаҡтары .. һүрәтләнә ине.* И. Солтанов. **Алма үләне** дегәнәк япраҡлы, йыуан ғына һабаҡлы, ваҡ көпшә сәскәле дарыу үләне. **Баҙыян үлән** *кар.* **баҙыян. Баҡа үләне** *кар.* **тәлмәрйен үләне. Бей үлән** мышар япраҡлы биш түнәрәк таждан торған ялтыр, ваҡ һары сәскәле һыу үләне. **Бесәй үләне** оҙон һабаҡлы, ҡара-ҡаршы оҙонса япраҡлы, ваҡ суҡ сәскәле дарыу үләне. **Бысҡы үлән** эре аҡ сәскәле, бысҡы теше һымаҡ сәнскәк япраҡлы һыу үләне. **Бәпкә** (*йәки* **ҡаҙ**) **үләне** тапалған ерҙә үҫә торған ваҡ ҡына япраҡлы ҡыҫҡа үлән. *Ғәлиҙең бала сағы ауыл урамындағы бәпкә үләне өҫтөндә тәгәрләп үтте.* «Совет Башҡортостаны", 1970, 24 хинуар. **Елем үләне** ике телле биш таждан торған ал көрән төҫтәге ваҡ сәскәле, эсе ҡыуыш оҙонса касалы, ҡыҙғылт төҙ һабаҡлы йәбешкәк үлән. **Ерек үләне** *диал.* еркәүек. **Зәлеш үләне** ваҡ япраҡлы, ваҡ тупалсаҡ башлы ҡаты ер үләне. **Йомран үлән** ылыҫлы урмандағы серемтә өҫтөндә үҫә торған итләс тәңкә япраҡлы, ҡыңғырау һымаҡ суҡ сәскәле, хуш еҫле, аҡһыл һары төҫтәге үлән. **Йондоҙ үлән** эре аҡ йондоҙ сәскәле, ҡыҫҡа, төҙ һабаҡлы һуҡтаһыҙ түңәрәк япраҡлы дымлы ер үләне. **Йорт үләне** *диал. кар.* **бәпкә үләне. Кейәү үләне** өйкөм-өйкөм булып тауҙа үҫкән ваҡ япраҡлы, алһыу ваҡ сәскәле, хуш еҫле дарыу үләне. *[Барсын:] Һөлөк арты яраһына ябырға тип, кейәү үләне йыйып ҡуйғайным.* Һ. Дәүләтшина. **Кирәү үлән** *диал.* ҡылған. **Көкөрт үләне** ергә түшәлеп үҫкән һабаҡлы, ылыҫ япраҡлы, һеркәле башаҡтары өҫкә ҡарап торған урман үләне. *Августа ҡуйы шыршы урмандарында көкөрт*

үләне сәскә ата. «Башҡортостан тәбиғәте календары», 1961. **Күҙ үләне** тау-ташта үҫкән бик ваҡ әрем; таш әреме. **Ҡайрау үлән** ҡайраҡ һымаҡ быжырмаҡ ҡыяҡ япраҡлы, һабаҡ осонда башаҡланып торған сәскәле бейек үлән. **Ҡан үлән** киртләс эре япраҡлы, төбөнән үк тарбаҡланып торған һабаҡлы, күкһел, алһыу, аҡһыл төҫтәге ваҡ сәскәле дарыу үләне. **Ҡандала үләне** өсәре-өсәре бер һуҡтаға урынлашҡан ваҡ ҡына киртләс япраҡлы, һабаҡ буйлап сыҡҡан аҡ, һары төҫтәге ваҡ сәскәле, хуш еҫле баллы үлән. **Ҡарлуғас үләне** дымлы ерҙә үҫә торған йыуан ҡыҫҡа һабаҡлы, итләс, йөрәк япраҡлы, һары сәскәле, тамыры бүлбәле ағыулы үлән. **Ҡарһаҡ үлән** асыҡ урындарҙа башҡа үҫемлектәргә ҡаҙалып үҫә торған ваҡ ҡына аҡ, ал ирен сәскәле ҡыҫҡа һабаҡлы ҡый үләне. **Ҡомай үләне** башаҡлылар ғаиләһенә ҡараған эре елбәгәй башлы аҙыҡ үләне. **Ҡуян үләне** ҡоро ерҙә үҫә торған тарбаҡай һабаҡлы, оҙонса киртләс япраҡлы, тажһыҙ сәскәле ваҡ ҡына ҡый үләне. **Ҡылыс үлән** екәнле ҡамыш. **Сөйәл үләне** йомшаҡ япраҡлы, тарбаҡай мурт һабаҡлы, ваҡ һары сәскәле, һары һөтлө дарыу үләне. **Судан үләне** Россияға 1912 йылда Африканан килтерелгән ҡоролоҡҡа сыҙамлы, юғары уңышлы бер йыллыҡ үлән. **Сәй үләне** *шул уҡ* **сәй уты** (*ҡар.* **ут** [2]). **Тал үләне** ҡара бөрлөгәндеке һымаҡ япраҡлы, биш таждан торған ваҡ-ваҡ ҡына һары сәскәле нәҙек быуынтыҡ һабаҡлы сырмалсыҡ үлән. **Татыр үләне** быуынтыҡ һабаҡлы, төк-төк япраҡлы, энә күҙәүендәй генә сәскәле бер йыллыҡ үлән. **Тауыҡ үләне** *диал.* томбойоҡ. **Тимрәү үләне** итләс япраҡлы, ҡыҙғылт сәскәле, һутлы тау үләне. **Тут үләне** таралыбыраҡ торған ялбыр, оҙон башаҡлы һолоға оҡшаған үлән. **Тырнаҡ үлән** тарманыҡы һымағыраҡ япраҡлы, биш таждан торған күкһел көрән йәки алһыу төҫтәге эре сәскәле, төҙ, бейек һабаҡлы күп йыллыҡ дарыу үләне. **Тәлмәрйен үләне** һыу буйында, ҡырсында түшәлеп үҫә торған ваҡ киртләс япраҡлы, һары сәскәле үлән. **Үгәй инә үләне** яңғыҙ һары сәскәле, түңәрәгерәк япраҡлы дымлы урында үҫкән үлән. **Хәшәф үлән** эре киртләс япраҡлы, төҙ, бейек, ҡаты һабаҡлы, миләүшә төҫөндәге бер тумалаҡ сәскәле күп йыллыҡ үлән. **Һабын үләне** *шул уҡ* **һабын сәскәһе** (*ҡар.* **сәскә**). **Һеркә үлән** *диал.* көтөүсе муҡсаһы (*ҡар.* **муҡса**). **Һиҙәп үлән** *диал.* бесәй табаны (*ҡар.* **бесәй**). **Һөт үләне** *диал.* һөтлөгән. **Шалтырауыҡ үлән** ваҡ ҡына аҡ тәңкә сәскәле, шалтырап торған орлоҡло ялан үләне. **Шеш үләне** тәлгәш йүкә япраҡлы, төҙ бейек һабаҡлы, аҡ сатыр сәскәле дарыу үләне. **Шыршы үлән** *диал.* ҡырҡбыуын. **Ынйы үләне** ваҡ аҡ ҡыңғырау сәскәле, киң оҙонса япраҡлы урман үләне. **Эт үләне** көҙ сәскә атып, яҙ орлоҡлана торған яҫы ҡыяҡ япраҡлы, ҡыҫҡа һабаҡлы, төбө һуғандыҡы һымаҡ тамырлы, ағыулы тау үләне.

**ҮЛӘҢ** *и.* Думбыра сиртеп, көйгә һалып әйтә торған ҡаҙаҡ шиғыры. *Түй үләңе. Үләң сығарыу.* ■ *Көтөүҙең ситендәрәк ҡорогон ергә ҡаҙаған, әйәрле атын сеҙәрләп ебәргән көтөүсе ҡаҙаҡ егете үләң әйтеп ултыра ине.* И. Көҫәпҡол.

**ҮЛӘҢСЕ** *и.* Үләң әйтеүсе.

**ҮЛӘТ** *и.* Ҡапыл таралып, малды, кешене күпләп ҡырған йоғошло ауырыу. *Мал үләте. Үләт йылы.*

♦ **Үләт тейгер** әрләгәндә, ҡарғағанда әйтелә.

**ҮМГӘН** *и. иҫк.* Аттың күкрәге, түше.

♦ **Үмгәнгә һалыу** тырышлыҡ, көс һалыу. *Эште үмгәнгә һалып алып барыу.*

**ҮМЕЛДЕРЕК** *и. диал.* Күмелдерек.

**ҮНГӘР** *и.* Хан эргәһендәге ҡоралы һаҡсылар төркөмө; нөгәр. *Хан хәбәре килеп етте Тамьянға. Быны ишеткәс, Тамьян батыр ҡалған таңға. Йөҙ илле үнгәр йыйып алып, тиҙ генә китмәк булған Мәсем ханға.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

♦ **Кейәү үнгәре** кейәүҙең туйҙағы иптәше; кейәү егете.

**ҮНЕР** *и. диал.* Иҫтәлек.

**ҮНӘ:** **үнә буйы** *диал.* һәр ваҡыт, гел. *Үнә буйы йөрөү.*

**ҮНӘМӘ:** **үнәмә буйы** *диал.* гел, һәр ваҡыт.

**ҮНӘР** *и. диал.* һөнәр. *Бер нәмәне үнәр итеп алыу. Балыҡ тотоу ҙа булдымы үнәр.*

**ҮНӘРҺЕҘ** *с. диал.* һөнәрһеҙ. *Үнәрһеҙ кеше.*

**ҮҢ** *и.* **1.** Тештең йылтыр аҡ төҫтәге иң тышҡы ҡатлауы; эмаль.

**2.** *ҡар.* **эмаль** 1. *Үң йүгертеү. Һауыттың үңе ҡупҡан.*

**3.** *кусм.* Ус, табан тиреһенең бешеләнеп ҡатҡан өҫкө ҡатламы.

**ҮҢГӘ** *с. иҫк.* Башҡа, бүтән.

**ҮҢГӘҘӘҮ** *ҡ. ҡар.* **үңгәләү**.

**ҮҢГӘЙ** *киҫ. иҫк.* Тотош, гел. *[Тамьян] йөҙ илле үңгәй батыр йыйып алып, тиҙ генә етмәк булған Мәсем ханға.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

♦ **Бер үңгәй** бер иш, бер төрлө, оҡшаш.

**ҮҢГӘЛӘТЕҮ** *ҡ. диал.* Иҫәнгерәтеү, һеңгәҙәтеү. *Һуғып үңгәләтеү.*

**ҮҢГӘЛӘҮ** *ҡ. диал.* Иҫәңгерәү, һеңгәҙәү. *Ҡурҡышымдан үңгәләп ултырам.*

**ҮҢГӘМ** *и. ҡар.* **үмгән.**

**ҮҢГӘМЛӘҮ** *ҡ. иҫк.* Хуплау, ҡеүәтләү. *Әҙ генә үңгәмләһәң, килешерә.*

**ҮҢГӘМЛӘШЕҮ** *ҡ. иҫк.* Көс-ҡеүәт һалыу; көсләшеү. *Үңгәмләшеп эшләү.*

**ҮҢГӘРЕҮ** *ҡ. диал. ҡар.* **үҙгәреү** [1].

**ҮҢДЕК** *и. ҡар.* **үңлек.**

**ҮҢДЕРСӘК** *и.* Муйындан түбәнгә һанағанда, умыртҡа һөйәгенең алтынсы быуыны.

**ҮҢЕР** [1] *и.* **1.** Үңәстең түбәнендәге соҡор. *Елдәр аса минең үңеремде* (Халыҡ йырынан).

**2.** (*йәки* **тау үңере**) Тау битенең түбәнге өлөшө; тау итәге. *Үңерҙе сығыу.* ■ *Тау моронон әйләнгәс, һөҙәгәйгән үңерҙәрендә, битләстәрҙә тарау-тарау булып ауылдар ултырған.* Ж. Кейекбаев. *Урал үңерҙәре һалҡын, тиҙәр, Урал үңерендә йылҡы юҡ* (Халыҡ йырынан).

**ҮҢЕР** [2] *и. ҡар.* **үнгәр.**

♦ **Кейәү үңере** *шул уҡ* **кейәү үнгәре** (*ҡар.* **үнгәр**).

**ҮҢЕРБАУ** *и.* Күлдәк яғаһының үңәс төбөнән бәйләй торған бауы. *Үңербау тағыу. Үңербауҙы бәйләү.*

**ҮҢЕРЛӘҮ** *ҡ. диал. ҡар.* **сигеү** [3].

**ҮҢЕРӘШ** *и. диал. ҡар.* **ҡурылдай** [1].

**ҮҢЛЕК** *и.* Эйәрҙең сергеһе менән тирлеге араһына һалына торған кейеҙ. *Төлкөсура.. үҙенә быйыл ғына менгегә өйрәтелгән тайын йүгәнләп, үңлек һалып, эҙерләп ҡуйған.* Н. Мусин. *Ҡара ҡырпыу үңлегеңде нағышларбыҙ, юрғам* (Халыҡ йырынан).

**ҮҢЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Үң (2 мәғ.) менән ҡаплау. *Һауытты үңләү.*

**2.** *кусм.* Бешеләнеп ҡатыу (ус, табан тиреһенә ҡарата). *Ус үңләгән. Табан үңләгән.*

**ҮҢӘҘ** *и.* **1.** Иҫке эркет, ҡымыҙ, аш-һыу өҫтөндә барлыҡҡа килгән күк. *Үңәҙ бәшмәге. Үңәҙ еҫе. Үңәҙҙе шешеккә ябалар.*

**2.** Сереп барған дымлы нәмәләге йөнтәҫ күк. *Картуф үңәҙе.* ■ *Улар [себендәр] йәй буйы еллетелмәй торған үңәҙ еҫенән, ҡараңғынан, һалҡынан ҡаса.* Х. Мохтар. *[Ғибаҙулла] келәһенә ҡасандыр әсәһе тығып киткән ағас ботағын алып, .. ишекте асып ебәрҙе. Эстән үңәҙ еҫле еүеш һауа бөркөлдө.* Р. Солтангәрәев.

**3.** Ауырыу кешенең теле өҫтөнә ултырған аҡ.

**4.** *диал. ҡар.* **ҡаҫмаҡ** 3.

**ҮҢӘҘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Үңәҙ (1 мәғ.) менән ҡапланыу, үңәҙлегә әйләнеү. *Ҡатыҡ үңәҙләнгән. Ағас күнәкте оҙаҡ йыумаһаң, үңәҙләнеп китә.*

**ҮҢӘС** *и.* **1.** Муйындың алғы яғы. *Полковник уны өнһөҙ генә тыңланы, тик каштарының йыйырылыуы, тештәрен ҡыҫыуҙан үңәс тамырҙарының бүртенеүе уның мөмкин тиклем тыныс тоторға тырышыуын, әммә нык ярһыуын һиҙҙерә ине.* А. Мағазов. *Мәскәй ҡапыл Тамыр батырҙың үңәсенә йәбешкән дә быуа башлаған* (Әкиәттән).

**2.** *ҡар.* **муйын** 1. *Ҡырк-ҡырк биш йәштәрҙәге сибәр генә бер ҡатын оҙон үңәсле көршәк күтәреп килеп инде.* С. Агиш. *Мин уның [эттең] .. үңәсендәге ҡайыш муйынсаһын күреп ҡалдым.* С. Кулибай.

♦ **Ағас үңәс** тын юлының кимерсәк көпшә рәүешендәге өлөшө; ҡурылдай. **Ҡурай үңәс** *диал. ҡар.* **ҡурылдай**[1]. **Ҡыҙыл үңәс** ашҡаҙанға төшкән аш юлы. **Ҡыл үңәс** тамаҡтан аш үтмәй торған ауырыу.

**ҮПКӘ**[1] *и.* **1.** Умыртҡалы йән эйәләренең күкрәк ҡыуышлығында урынлашҡан тын алыу ағзаһы. *Уң яҡ үпкә. Һул яҡ үпкә. Үпкә сире. Үпкәгә һыуыҡ тейеү. Үпкә шешеү.* ■ *Киң йылға яғынан танауға саф һалҡынса һауа инеп, үпкәләрҙе таҙартып сыға.* Ғ. Дәүләтшин.— *Ошо сәй менән оҙон көн буйына ултырып, үпкә йыуҙырмаһам, ашағандай ҙа булмайым.* Д. Буләков.

**2.** (*йәки* **сипарат үпкәһе**) *диал.* Күпмәс.

♦ **Ауыҙын асһа, үпкәһе күренә** *ҡар.* **ауыҙ. Ҡара үпкә** туберкулез. *Ҡара үпкә булыу.* **Үпкә ҡабарыу** асыуланып ярһыу, асыу ҡабарыу. *Уның [председателдең] тулап бөткәнен көтөп торманым, урамға сыҡтым, сөнки үҙемдең үпкә ҡабара башлағандай булды.* Ә. Зәйнуллин.

**ҮПКӘ**[2] *и.* Ғәҙел булмаған бер нәмәгә йәберһенеү, рәнйеү тойғоһо. *Үпкә һүҙе. Үпкә белдереү. Үпкә тотоу.* ■ *Башҡа ырыуға оҙатылған ҡыҙ ата-әсәһенә, ағаларына, еңгәләренә, ҡайны-ҡәйнәләренә, кейәүенә үҙенең бөтә үпкәһен, зарын йола буйынса сеңләү менән әйтер булған.* Ж. Кейекбаев. *Вәлимәнең үпкәһе төҫөнә сығып, бите ҡыҙарҙы.* Һ. Дәүләтшина. *Һуғыш алдынан алған шаршауыбыҙ ҙа ҡырк ҡорау булып туҙып бөткән. Хәйер, уға ни үпкә инде.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҮПКӘ-БАУЫР** *и. йыйн.* Һуйған малдың йөрәк, үпкә, бауыры. *Үпкә-бауыр тултырмаһы. Үпкә-бауыр бәлеше.*

**ҮПКӘЛЕ** *с.* Үпкә[2] ҡатыш; йәберле. *Үпкәле ҡараш. Үпкәле һүҙ.* ■ *[Айбулат:] Ҡотлояр ағай менән беҙ гүмергә талашҡаныбыҙ юҡ. .. Башҡалар менән дә татыулыҡ боҙорҙай бер үпкәле эшебеҙ булғаны юҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**ҮПКӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Үпкә[1] (1 мәғ.) һымаҡ булыу. *[Карт:] Илай-илай күҙ үпкәләнеп бөтә торғайны.* Н. Ҡәрип.

**ҮПКӘЛӘТЕҮ** *ҡ.* Үпкә[2] тойғоһо уятыу; рәнйетеү. *[Ғәтиә:] Самсон, Зөләйхаҡы ниңә үпкәләттең, улай яңы ғына танышып, хәҙерҙән үк үпкәләшеү ярамаҫ, күңелен тап.* Т. Йәнәби.

**ҮПКӘЛӘҮ** *ҡ.* Үпкә[2] тойғоһо кисереү, үпкә[2] тотоу; рәнйеү. *Үпкәләп йөрөү. Үпкәләп китеү.* ■ *Ҡоҙалары баланы бирмәгәс, Әхмәҙи менән Факиһа үпкәләберәк ҡайтып китте.* Ж. Кейекбаев. *Ана теге Йәмилә, саҡ ҡына һүҙ әйтһәң, үпкәләй әллә ниңә.* К. Кинйәбулатова. *[Бай:] Һарыҡтарҙы юғалта торған булһаң, миңә ҡарап үпкәләмә.* Т. Хәйбуллин. **Үпкәләһәң, үпкә ашарһың** башҡа үпкәләгән кешегә әйтелә.

**ҮПКӘЛӘШ** *и.* Ике аралағы үпкә, үҙ-ара үпкә. *[Әбей:] Үпкәләш тип ни, ниндәй үпкәләш булһын инде.* Х. Түләкәев. *[Бәһлеүән — Кейеҙбайға:] Иллә мәгәр, гүмерлек гәрип булып ҡалһаң, үпкәләштән булмаһын!* (Әкиәттән).

**ҮПКӘЛӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **үпкәләү.** ■ *Ярай, етәр. Үпкәләшмәйек. Һин дә ҡыҙма, мин дә туҡталам.* С. Агиш.

**ҮПКӘСЕЛ** *с.* **1.** Тиҙ үпкәләп барыусан. *Үпкәсел бала. Үпкәсел булыу.* ■ *Үпкәсел бай егеттәренә был етә ҡалған: гәрлектәренән ни эшләргә белмәй, уҡ кеүек атылып, баҡсанан сығып киткәндәр.* Ф. Рәхимғолова.

**2.** Үпкә[2] тойғоһо белдергән. *Иртән Хәлкәс малайҙарҙы үҙҙәренең ҡапҡа төбөндә осратты. — Аңламайым мин һеҙҙе,— тине ул үпкәсел тауыш менән.— Һеҙҙең арҡала оятҡа ҡалдым.* Р. Ғабдрахманов.

**ҮПТЕРЕҮ** *ҡ.* Үбергә ирек ҡуйыу. *Маңлайҙан үптереү.* ■ *„Үп!“ — тине лә үптермәне, күҙҙән тайҙы.* Ш. Бабич.

**ҮПӘКӘЙ: үпәкәй итеү** *шул уҡ* **үпәс итеү** (*ҡар.* **үпәс**). *Донъя булғас, төрлөһө була: үпәкәй ҙә супәкәй итеп кенә торолмай, талашып та киткән саҡтарың була.* Т. Килмөхәмәтов.

**ҮПӘС: үпәс итеү** *ирк.* үбеү. *Ирендән үпәс итеү.*

**ҮР** *и.* **1.** Юғарылағы урын, бейек урын. *Үргә менеү. Үрҙән ҡолап төшөү.* ■ *Теләһә ҡалай яһалған ауыр һәнәк менән үңған игендең төшөмлө көлтәләрен үргә, әҫкерт бөшына ырғытҡанда, тәндең һыҙланыуы тағы ла көсәйә, тағы ла арта.* Ғ. Дәүләтшин. *Беҙ, уттай янып, күнәктәр менән фургонға һоло тултырабыҙ. Хәким ағай үрҙә көрәк менән таратып, тигеҙләп тора.* Й. Солтанов.

**2.** Юғарғы тараф; өҫ. *Үргә карау. Ҡулды үргә һоноу.* ■ *Ҡаҙ себештәре сотор-сотор итеп, .. эркелгән һыуҙы суҡыштары менән һөҙөп эсеп, баштарын үргә күтәреп йоталар.* Һ. Дәүләтшина. *Мөлөк ағай .. Турысайҙы һыуытыу өсөн туғарып, тәртәһен үргә күтәреп бәйләп ҡуйҙы.* Т. Хәйбуллин. *Маһайған тауҙар түбәһе үрҙәргә үрелеп тора.* Р. Ниғмәти.

**3.** Ер өҫтөнөң бейегәйә барған урыны, ҡалҡыуға киткән ер. *Текә үр. Тау үренә менеү. Үрҙе сығыу.* ■ *Ирәндек үрен артылыуға күҙ бәйләнә төштө.* С. Кулибай. *Эй оҙон тойола торғайны ла ошо үр! Менәһең-менәһең, осо күренмәй. Менеп еттем тигәндә, тағы бер ҙур үр күренә.* Р. Солтангәрәев. *Юл һөҙәк үргә үрмәләй. Ул һиҙҙермәй генә күтәрелә килеп, йәнә тау түбәһенә әйләнә.* Я. Вәлиев.

**4.** Һыуҙың, елдең һ. б. йүнәлгән яғына ҡаршы яҡ. *Ел үре. Йылға үре. // Үр яҡ.* ■ *Ваҡ ҡына аҙым менән ашыға-ашыға үргә ҡарай уҙып барған Мөлөк ҡарт боролоп, [юлсының] эргәһенә килде.* Т. Хәйбуллин. *Еҙем һыуҡайының үрендә шул ҡарағас та урман күренә* (Халыҡ йырынан).

**5.** *күсм.* Эш, тормоштағы юғары ҡаҙаныш. *Үр артынан үрҙәр яулай кеше, ул ынтыла һаман юғары.* Ш. Бикҡол.

**6.** *диал. кар.* **түр.** 2.

♦ **Үр ҡуяны** *кар.* **урғуян.**

● *Үгәй үргә һикертә.* Мәҡәл.

**ҮРГЕ** *с.* **1.** Юғары тарафтағы. *Үрге яҡ.* ■ *Сейәбикә .. ҡолғаһын ала һалып, төбөн урындыҡ ҡаҙнаһына терәп, үрге осон түбә таҡтаға татаны.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Һыуҙың, елдең һ. б. йүнәлгән яғына ҡаршы яҡтағы. *Үрге кисеү.* ■ *Байгужа минең ауылдаш. Ул беҙҙең ауылдың үрге осонда, Йәйентамаҡ күле янында ултырған Байназар тигән ярлы кешенең балаһы.* Д. Юлтый.

**ҮРГЕН** *и.* Ағасы ҡырҡылған ергә яңынан сыҡҡан йәш үҫенте.

**ҮРГЕНДЕ** *и. кар.* **үрген.**

**ҮРГЕНЛӘНЕҮ** *к. кар.* **үргенләү.**

**ҮРГЕНЛӘҮ** *к.* Юғары күтәрелеү, буй алыу. *Үргенләп китеү.* ■ *Пионерҙар тырышып ҡарағанғалыр инде, ағастар барыһы ла бик һәйбәт үргенләгән.* Ә. Вәли. *Ике яҡ эргәһендәге таҡталар ҡутарып ташланғанлыҡтан, ут үргенләп китә алмай, һүрелә төшкән ине.* Н. Мусин.

**ҮРГЕС: сәс үргес** *кар.* **сәсмәү.**

**ҮРГЕҮ** *к. диал.* Үргенләү.

**ҮРҘЕРЕҮ** [1] *к.* Сәсмәгән көйө моронлап үҫергә юл ҡуйыу. *Бәрәңгене баҙҙа үрҙереп һалып ҡуйыу.*

**ҮРҘЕРЕҮ** [2] *к. йөкм. кар.* **үреү** [2]. *Ҡамсы үрҙереү.*

**ҮРҘӘК** *и. диал.* Өйрәк.

**ҮРЕЛЕҮ** [1] *к.* **1.** Үргә күтәрелеү; үрләү. *Өҫкә үрелеү. Тауға үрелеү.* ■ *Тау үренә үреләгенә башлағайным, алыҫтан .. Ҡарауыҙҙың тауышын ишеттем.* С. Кулибай. *Күгәреп күккә үрелгән ҡарлы башын Уралдың .. мәңге данлар инем мин.* Салауат Юлаев.

**2.** Юғарыға табан бөтә кәүҙә менән ынтылыу, муйынды һуҙыу. *Ҡолсобай Степан йәшәгән ағас өй эргәһенә барҙы. ..Шәм янған бүлмә тәҙрәһенән үрелеп ҡараны.* Я. Хамматов. *Үреләүреләҡыҙҙар тәҙрә йыуа.* Р. Бикбаев. *Ҡарт .. алма ағасының алмаһын үрелеп өҙөп ала* (Әкиәттән).

**3.** Ниҙелер алыр өсөн ҡулды һоноу; һонолоу. *Ашҡа үрелеү. Үрелеп алыу.* ■ *Алда ятҡан помидорға үрелдем.* С. Агиш. *Ниғмәтйән яһалған сынаяғына үрелеп тә ҡараманы, өҫтәл ситенә башын төртөп, төнәй башланы.* Ф. Иҫәнғолов.

**4.** *күсм.* Ҙур эш, маҡсатҡа ынтылыу. *Кисә генә «ҡара малай» инем, бөгөн килеп вузға үрелдем.* Ғ. Амантай.

**ҮРЕЛЕҮ** [2] *к.* **1.** *төш. кар.* **үреү** [2]. *Икегә ярып үрелгән сәс. Талдан үрелгән ситән. Дүрттән үрелгән ҡамсы.*

**2.** Үргән һымаҡ уралыу. *Үрелеп үҫеү.* ■ *Боҡтары бер-береһенә үрелгән бейек-бейек ағастар ҡояш нурҙарын да үткәрмәй.* Ш. Янбаев. *Диңгеҙ берсә йәшен саҡҡылары менән үрелеп, утлы өйөрмә булып күккә күтәрелгән.* З. Биишева.

**3.** *күсм.* Үҙ-ара аралашыу, бәйләнешеү. *Күп ваҡыт тәбиғәт күренештәре геройҙың эске кисерештәренә үрелеп бирелә, уны асырға ярҙам итә.* Ғ. Әбсәләмова. *Йырға йыр үрелде.* Р. Бикбаев.

**ҮРЕЛЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **үрелеү** [2]. *Үрелешеп үҫеү.*

**ҮРЕЛМӘ** *с. кар.* **үрмә** [1].

**ҮРЕМ** *и.* **1.** Ниндәй ҙә булһа үрелгән бер нәмә. *Ҡомалаҡ үремдәре. Сәс үреме.*

**2.** Бер үрергә етерлек күләм. *Ике үрем сәс.* ■ *Минең сәсем етә үрем, етенән үрмәһәм дә* (Халыҡ йырынан).

**ҮРЕМЛЕК** *с.* Үрергә етерлек. *Бер үремлек тал.*

**ҮРЕНДЕ** *и.* Үҫемлек һабағының орлоҡтан, бүлбенән, тамыр һабаҡтан, һуғанбаштан яңы ғына үҫкән өлөшө. *Бәрәңгенең үренделәре. Орлоҡтарҙың үренделәре.* ■ *Өй артынан ҡыйһай үренделәре ҡаплаған баҡса һуҙыла.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҮРЕҮ** [1] *к.* **1.** Сәсмәгән көйө моронлап үҫеү. *Үреп сығыу. Үргән бәрәңге.* ■ *Хәҙер күтәрем дәрҙә, күбәләрҙә ятҡан ашлыҡтар ҡыҙа, үрә башланы.* Б. Бикбай. **Тамыр үреү** *кар.* **тамыр.**

**2.** Үҫеп оҙонайыу. *Буйға үреү.* ■ *Яҙғы һөрөм менән сәскән һабан ашлыҡтары ғыра, яңыраҡ һабаҡҡа үреп, ҡамылдарын ҡатырырға тырышып ята.* Ғ. Дәүләтшин. *Йүгереп кенә йүгереп уттар һалдым күл буйына үргән күрәнгә* (Халыҡ йырынан)./ Үрсеп күбәйеү. Ятып ҡалған бер бәрән мең ҡуй булып үргән ер (Ҡобайырҙан).

**3.** Яңынан яралып үҫеү. *Яраға ит үрә башланы.* ■ *— Ошо тулҡында сайҡалып, ошо сапҡында айҡылып, тәненә ит үрмәй, йөрәгенә май ҡунмай, бауыр һөйрәп, ыҙа сиккән Ҡусәрбай ҡусты ла беҙҙән китте.* Т. Хәйбуллин.

**ҮРЕҮ** [2] *к.* **1.** Бер нисә тындан төрлөсә аралаштырып, салыштырып бер нәмә яһау. *Өстән үреү. Һигеҙҙән үреү. Ау үреү. Кәрзин үреү. Мурҙа үреү. Сәсте таҫмалап үреү.* ■ *Атайым бик матур һәм нык итеп сабата үрә белә ине.* Т. Йәнәби. *[Исмәғил бабай:] Ошо яҡ-*

*лап ситән тәпәшәйгән, сыбыкты өҫтәп тә үрергә тура килер.* К. Кинйәбулатова. *Ебәк кенә кушып урә алманым ерәнсәкәй атым ялына* (Халыҡ йырынан). **Сикәләп үреү** сәсте ике яҡ сикә буйынан үреп килеп, толомға ҡушыу.

**2.** *күсм.* Ҡушып аралаштырыу, бергә бәйләү. *[Батырша] үҙенең башынан кискән ваҡиғалар ағышын замананың тарихи хәлдәре .. менән үреп алып бара.* Ғ. Хөсәйенов.

**ҮРЕШ** *и.* Малдың яҡын тирәлә көтөүһеҙ йөрөп ашай торған ере. *Үрешкә ҡыуыу. Үрештә йөрөү. Үрештән ҡайтыу.* ■ *Көнө буйы сыуаҡта ятҡан кәзәләр киске үрешкә сыға.* Я. Хамматов. *Аттар ҡыуаҡ буйҙарындағы үрешкә илтеп тышалды.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҮРЕШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* үреү [2] 1. *Ситән үрешеү.*

**ҮРЕШЛӘҮ** *к.* Үрештә ашау. *Үрешләп йөрөү. Үрешләгән мал.*

**ҮРКӘҮ** *к. диал.* Үргенләү.

**ҮРКӘН** *и. диал.* Үрген.

**ҮРКӘС** *и.* **1.** Дөйәнең арҡаһындағы тупайып, көмрәйеп сығып торған ҙур оро. *Дөйә үркәсе. Ҡуш үркәс. Һыңар үркәс.* ■ *[Хөсәйенов:] Дөйә .. арҡаһына кеше менеп йөрөгәндә йомшаҡ булһын өсөн үркәстәр ҡуйып яратылған.* С. Агиш.

**2.** (*йәки* **тау үркәсе**) Тауҙың бейек булып торған ҡуш түбәһе./ *Үркәс тау.* ■ *Тау үркәсенә менеп, аръяҡҡа ауышҡас, ауыл йәшендә.* Ж. Кейекбаев. *Үркәс тауҙарҙың уң яҡтағы һының түбәһенән килеп ҡыялап төшкән текә берләм юлдан дөпөлдәп сабып төшкән ҡара айғырҙың тояҡ тауышы төнгө тынлыҡҡа сик ҡуйҙы.* Һ. Дәүләтшина.

● *Бер бейәнең ике имсәге — береһе кипһә, һөтө юҡ; бер дөйәнең ике үркәсе — береһе китһә, көсө юҡ.* Әйтем.

**ҮРКӘСЛӘНЕҮ** *к.* Үркәсле булыу. *Үркәсләнеп калҡҡан тауҙарҙан бормаланып төшә шишмәләр.* А. Игебаев.

**ҮРКӘСЛӘҮ** *к. диал.* Артмаҡлау, йөкмәү.

**ҮРЛЕ-ҠЫРЛЫ** *р.* Үргә лә, ҡырға ла; төрлө яҡҡа. *Үрле-ҡырлы йөрөү.* ■ *[Таңдыса] бейек-бейек, үрле-ҡырлы ятҡан тау ҡыҫаландары буйлап йөрөй торғас, .. ян-яғы ҡамаулы, тигеҙ урынға барып сыға.* «Ҡуңыр боға».

♦ **Үрле-ҡырлы һикереү** ниш.ләргә белмәй һикерәнләү. *Ҡыуаныстан үрле-ҡарлы һикереү.*

**ҮРЛЕ-ТҮБӘНЛЕ** *р.* Бер үргә, бер түбәнгә. *Үрле-түбәнле йөрөү. Үрле-түбәнле ҡарау. Үрле-түбәнле осоу.* ■ *Кемдәрҙер урамда шарт-шорт ат тояҡтары тауышы сығарып, үрле-түбәнле саба.* Т. Хәйбуллин.

**ҮРЛЕ-ТҮРЛЕ** *р.* Бер түргә, бер ҡирегә. *[Малайҙар] үрле-түрле йөрөп, өйҙө шаулатып алды ла Ваняны деүләтеп алып сығып киттеләр.* С. Агиш.

**ҮРЛӘС** *и.* Тауҙың үргә тартылған өлөшө; тау үре. *Үрләскә менеү. // Үрләс ер. Үрләс юл.* ■ *Уйһыулыҡтан юл үрләстәргә үрләй.* Ғ. Хөсәйенов. *Күренеп торһа ла баҫыу шаҡтай алыҫ ине. Унан һуң оҙон ғына үрләс ер менергә кәрәк. Ҡарт кешегә йәйәүләп менеүе ауыр ғына.* К. Мәргән.

**ҮРЛӘТЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* үрләтеү 1—3.

**ҮРЛӘТЕҮ** *к.* **1.** *йөкм. ҡар.* үрләү 1.

**2.** Урындыҡҡа, түргә уҙырға, менергә мөмкинлек биреү. *[Әбей — абыстайға:] Ҡырын күҙ һалманың. Өйөндөң түренә үрләттең. Байтаҡ ҡул кереңде ауыҙланым, усыңа йома белмәнең.* Т. Хәйбуллин.

**3.** *күсм.* Юғарыраҡ вазифаға, дәрәжәгә эйә итеү. *Директор итеп үрләтеү.* ■ *— Мине мөдир итеп үрләтеп тә ташланылар,— Әхмәт ағай икеләнеңкерәп тына төштө.* Ф. Иҫәнғолов.

**4.** *диал.* Ҡабыҙыу, тоҡандырыу. *Ут үрләтеү.*

**ҮРЛӘҮ** *к.* **1.** Үргә күтәрелеү; менеү. *Күккә үрләү. Тауға үрләү. Үргә үрләү.* ■ *Ике урында ут та ягып ебәрҙеләр. Үрләгән ялҡын тирәһенә кешеләр йыйыла.* С. Агиш. *Айға үрләп, нурға уйнап, күкрәгәмде нурланым.* Ш. Бабич. *Күбәләктәй бына бер ҡош ерҙән һауаға үрләй.* С. Кулибай.

**2.** Урындыҡҡа, түргә менеү. *Үрләп ултырыу.* ■ *[Түрәбай:] Ошо урында ла ярар. Беҙ түргә үрләп өйрәнмәгән.* Т. Хәйбуллин.

**3.** Һыу ағышының үренә барыу. *Ағиҙелкәйҙәрҙе ай үрләгән ҡанаттары ҡыҙыл күк бәрҙе* (Халыҡ йырынан).

**4.** *күсм.* Юғарыраҡ вазифаға өлгәшеү, эйә булыу. *Яуаплы эшкә үрләү. Директор булып үрләү.*

**5.** *диал.* Ҡабыныу, тоҡаныу. *Усаҡ үрләне.*

**6.** *диал.* Маһайыу.

**ҮРМЕС: сәс үрмес** сәскә ҡушып үреп, толом осонан төйөп ҡуя торған бау; сәсмәү. *[Тайба әбей] сәс үрмесенә таҡҡан ҡумаҡ аҫҡыстар араһынан береһен һайлап, һандыҡтың ҙур ҡара йоҙағына тотондо.* З. Биишева.

**ҮРМӘ** [1] *с.* **1.** Үрелеп, сырмалып үҫеүсән; үрмәле. *Үрмә гөл өй түбәһенә үрелә лә үрелә.* Ш. Бабич.

**2.** Үреп эшләнгән. *Үрмә йүгән. Үрмә ултырғыс.*

**ҮРМӘ** [2] *и. диал.* Әрйә.

**ҮРМӘ** [3]: **сәс үрмә** *диал.* сәсмәү.

**ҮРМӘКЕС** *и. диал.* Үрмәксе.

**ҮРМӘКЛӘҮ** *к. диал.* Имгәкләү. *Үрмәкләп барыу.*

**ҮРМӘКСЕ** *и.* Ау үреп, бөжәк тотоп туҡлана торған быуынтыҡ аяҡлы ваҡ йән эйәһе. *Үрмәксе ауы. Үрмәксе ояһы.* ■ *Талғын ғына иҫкән ел үрмәксе ептәрен ялан буйлап алып китте.* Ә. Вәли.

♦ **Үрмәксенән күрмәксе** берәүҙән берәү ниҙер күреп, эшләп барғанда әйтелә. *Йә инде, бәләкәстәре лә үрмәксенән күрмәксе, тигәндәй, өлкәнерәктәре ҡыланғанды ҡыланған була.* Р. Ғабдрахманов.

**ҮРМӘЛЕ** *с.* Үрелеп, сырмалып үҫеүсән. *Үрмәле гөл. Үрмәле сәскә.*

**ҮРМӘЛСЕК** *и. диал.* Үрмәләс.

**ҮРМӘЛӘС** *и.* Турғайҙар төркөмөнә ҡараған, ағас олоно буйлап аҫҡа һәм өҫкә яҡшы үрмәләй торған ҡошсоҡ.

**ҮРМӘЛӘҮ** *к.* **1.** Йәбешеп, тырмашып, өҫкә үрләү. *Ҡаяға үрмәләү. Ҡоймаға үрмәләү.* ■ *Айрас ҡапыл уянды ла, .. имән башына үрмәләне.* Ш. Насыров. *Тығыҙ йүкә япраҡтары*

*араһынан бейек тауға мендек беҙ үрмәләп.* Т. Йәнеби.

**2.** Уралып, сырмалып, үргә йүнәлеү, үргә үрләү (үҫемлеккә ҡарата). *Беседканың ҡабырғаларына ептәр бәйләнеп, шул ептәр буйлап үрмәле гөлдәр үрмәләгән.* Ғ. Хәйри.

**3.** *күсм.* Ниндәйҙер урынға, вазифаға үҙергә тырышып эш итеү.— *Беҙҙең һалдат комитетына ла офицерҙар үрмәләй бит әле.* А. Таһиров.

**ҮРМӘСЛӘҮ** *ҡ.* Төрлөсә үреү; үргеләү. *Үрмәсләп бөтөү.*

**ҮРНӘК** *и.* **1.** Эш, ҡылыҡҡа ҡабул итерлек, артынан эйәрерлек миҫал; өлгө. *Үрнәк алыу. Үрнәк күрһәтеү.* ■ *[Булат:] Ана бит Рахмай, унан үрнәк алырға кәрәк ул. Йәштәргә тырыша. Уҡыуын да уҡый, шиғыр ҙа һөйләй.* К. Кинйәбулатова. *Эштәреңдә үрнәк бул, ылаҫындай зирәк бул* (Сеңләүҙән).

**2.** Ниҙеңдер дөйөм һыҙатын күрһәтерлек бер дана; өлгө. *Батырлыҡ үрнәге.* ■ *Ғ. Сәләм дә тәнкитселәр тураһында яҙған шиғырында мине ҡыҫҡалыҡтың үрнәге итеп .. яҙып күйғайны.* С. Агиш.

**3.** Бер үк төрлө йәки оҡшаш нәмәләрҙең араһынан алынған дана; өлгө. *Аҫыл таш үрнәге. Яңы машина үрнәге.*

**4.** Сигеү, төшөрөү өсөн миҫал булған биҙәк. *[Сәрүәр:] Инәй, был ни хаҡ? [Ҡалпаҡты күрһәтә]. Ынйыһы вағыраҡ та, үрнәге матур эшләнгән.* Х. Ибраһимов.

**ҮРСЕЛ** *с.* Үргә табан шәп йөрөүсән. *Үрсел ат.*

**ҮРСЕМ** *и.* **1.** Үрсетеү өсөн тәғәйенләнгән мал. *[Саҙрый:] Бер бүре аҙбарҙы емереп, атайым үрсемгә тип биргән берҙән-бер һарыҡты йомдороп киткән.* Д. Исламов.

**2.** Үрсегәндән барлыҡҡа килгән мал йәки ҡош-ҡорт. *Үрсем алыу. Йәш үрсемде иҫән-һау үҫтереү өсөн бөтә көстө һалыу.* ■ *[Ырыҫкол:] Байбисә, бар малыңды кире ҡыуҙырырмын. Бары ла иҫәпле. [Тәнкәбикә:] Әүәл йылдарҙа биргәндәреҙең үрсемен дә берәм-берәм һанап ҡайтарырһың.* М. Кәрим.

**ҮРСЕМЛЕ** *с.* Тиҙ үрсеүсән, үрсеүгә шәп. *Үрсемле мал. Үрсемле ырыу.*

**ҮРСЕТЕЛЕҮ** *ҡ. төш. кар.* **үрсетеү.** *Үрсетелгән мал.*

**ҮРСЕТЕҮ** *ҡ.* **1.** Яңы тыуған йәш мал, ҡош-ҡорт, бала-саға иҫәбенә ниҙеңдер һанын арттырыу. *Тоҡом үрсетеү.* ■ *Сәлимә тәүге иренән ҡалған барлы-юҡлы малын аҙлап үрсетеп, тырышып, балаларын тәрбиәләне.* Һ. Дәүләтшина./ Яңынан үҫтерелгән үҫенде иҫәбенә һан яғынан арттырыу; ишәйтеү. *Алманы үрсетеү. Емеш-еләкте үрсетеү.*

**2.** Ишәйтеп, тәрбиәләп аҫрау. *Ат үрсетеү. Бала үрсетеү. Балыҡ үрсетеү.* ■ *[Нуриямал] колхозда өлгөлө рәүештә ҡуян үрсетергә тотонған. Уның ҡуяндары үҙе бер ферма булып бара.* С. Ҡудаш. *Йылҡы, дөйә, ҡуй үрсетеп, һунар йөрөгән, ҡоралдары ылыс менән уҡ булған, ти.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ҮРСЕТКЕС** *и.* Һуңынан таратыу өсөн йәш мал йәки йәш үҫемлек үҫтерә торған урын.

**ҮРСЕТМӘ** *и.* Һуңынан күсереп ултыртыу өсөн үрсеткестә үҫтерелгән йәшелсә үҫендеһе. *Кәбеҫтә үрсетмәһе. Помидор үрсетмәһе.*

**ҮРСЕТМӘЛЕК** *и. кар.* **үҫенте** 3. *Алмағас үрсетмәлеге. Ҡарағат үрсетмәлеге.*

**ҮРСЕҮ** *ҡ.* **1.** Тыуыу, донъяға яралыу менән һан яғынан артыу, ишәйеү. *Бала-саға үрсей. Балыҡ үрсей. Ҡош-ҡорт үрсей. Ҡуян үрсей.* ■ *Быйыл йәй ямғырлы, үлән үтә һутлы булыу арҡаһында шашып үрсегән серәкәйҙән ҡотолоу өсөн бында берҙән-бер сара булған төтөнлөккә утын өҫтәй[ем].* З. Биишева. *Ятып ҡалған бер бәрәс йөҙ ҡуй булып үрсер ер* (Ҡобайырҙан). / Шытыу, яңынан үҫеү менән һан яғынан артыу; ишәйеү. *Орлоҡтан үрсеү.*

**2.** *күсм.* Күпләп таралыу; күбәйеү. *Ғәйбәт үрсей. Сир үрсей.*

● *Ҡарағайға ҡарап тал үрсей, ҡараусыға ҡарап мал үрсей.* Әйтем.

**ҮРСЕШЕҮ** *ҡ. урт. кар.* **үрсеү** 1. *[Урал батыр:] Кешеләрҙең йопланып, быуын-быуын үрсешеп, бергә үйнап-көләшеп .. торасағын белдем мин.* «Урал батыр».

**ҮРСӘ** *и. диал. кар.* **урҙа**[1] 1.

**ҮРТ** *и.* **1.** Урман, далаға ҡапҡан ут. *Ҡамышҡа үрт һалыу. Урманға үрт һалыу.* ■ *Хәҙер урман да йылдан-йылға һирәгәйә, йәнлектәр, ҡоштар ҙа кәмеп бара. Һәр кем, башбаштаҡ ҡылып, үҙ белдеге менән ағас ҡырҡа, үрт һалып, урманды яндыра.* М. Тажи. *Йүгереп кенә йөрөп урттәр һалдым Ирәндекәй тауҙың үренә* (Халыҡ йырынан).

**2.** Өй, ҡаралтыға ҡапҡан ут. *Үрт һүндереү.* ■ *Үрт камаған йортто дәррәү һүндерәләр.* Ғ. Ибраһимов. *Ул ауылды әбей батшаның ғәскәрҙәре үрт һалып көлөн күккә осороп киткән.* З. Биишева.

◆ **Ҡуян** (*йәки* **сыҫҡан**) **үрте** йәйге эҫелә ер өҫтөнән зембәрләп осҡан быу. *Ҡояшлы йәй булһа, ташлы Ҡаштаҡ баштарында ҡуян үрте уйнай.* Н. Ғәлимов.

● *Үләнле ерҙе үрт алмаҫ.* Мәҡәл.

**ҮРТЕШ** *и. диал.* Ҡылыҡ, ғәҙәт. *Үртеш итеү.*

**ҮРТЛӘҮ** *ҡ.* Үрт һалып яндырыу; үртәү. *[Ағалары] ҡуҫтыларының утынын үртләп китергә булалар, ти* (Әкиәттән).

**ҮРТӘЛЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. кар.* **үртәү.** *Үртәлгән урман.*

**2.** *күсм.* Күңелгә насар тәьҫир итерлек берәй эш, ҡылыҡҡа әрнеү; үртәнеү, әсенеү, көйөнөү. *Аҫыуы баҫылып етмәгән тракторист Батталовтың хырылдап йоҡо һимертеүенә йәне үртәлеп, эштән ҡайтҡас, һуҡранып алды.* Я. Вәлиев. *Бюро ултырышы бөткәс тә Трофимов ҡайтырға ашыҡманы. Ишеткәндәрҙән тейешле һығымта яһап үртәлде, уйланды.* Я. Хамматов.

**ҮРТӘЛӘНЕҮ** *ҡ. кар.* **үрһәләнеү.** *Сакай Солтанов та ике ут араһында үртәләнә хәҙер.* Б. Бикбай.

**ҮРТӘМҺЕҮ** *ҡ. диал.* Үртәнеү.

**ҮРТӘН** *и.* Үрт һалып яндырылған урын. *Үртән бесәне.* ■ *Үртәндә үлән бик шәп үҫкән.* М. Тажи. *Ялан да ерҙең үртәне, тотоп булмай күк тә бүртәне* (Халыҡ йырынан).

**ҮРТӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Үртәнергә мәжбүр итеү. *Кешене үртәндереү.*

**ҮРТӘНЕҮ** *к.* Күңелгә ауыр булған берәй нәмәгә әсенеү; үртәлеү, көйөнөү. *Магазинда алыусы юк, тауар үтмәй. Приказчиктар тик тора. Хәбибулла бай үртәнә, сауҙа юклыкты приказчиктарҙан күрә.* М. Ғафури. *Үҙем булдыкһыҙмындыр инде, тип үртәнәм. .. Солтан ағайҙың малдары ана бер епкә бәйләгән кеүек йөрөй.* Я. Вәлиев. *Һаранбай үҙенең отолғанын һиҙеп, бик үртәнде, ти* (Әкиәттән).

**ҮРТӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **үртәү** 1. *Сәмрегошло батша башкорт ерен үс иткән дә үрткә үртәткән.* Ғ. Дәүләтов.

**ҮРТӘҮ** *к.* **1.** Үрт һалып, ут төртөп яндырыу. *Сүп үртәү. Һалам үртәү. Утта үртәү.* ■ *[Крәҫтиәндәр] баярҙың йортона ут һалып, үртәп ебәрергә булғандар.* М. Тажи. *[Халык] үлтерелгән дейеүҙең емтеген йыйып үртәп, көлөн күккә осорған* (Әкиәттән)/ Утта яндырып эшкәртеү. *Кирбес үртәү. Күмер үртәү.*

**2.** *күсм.* Күңелгә насар тәьҫир итерлек берәй эш, кылык менән әрнетеү; әсендереү, көйөндөрөү. *Кәнды үртәү. Йөрәкте үртәү.* ■ *[Байрамбикә:] һин Сәфәрғәле менән минең йәнемде үртәмә.* М. Хәйҙәров. *Ғәләү Дәүләтбайҙы үртәр өсөн һүҙҙе тағы ла Шәрифәгә борҙо.* Б. Хәсән.

**ҮРТӘШЕҮ** *к.* **1.** *урт. ярҙамл. кар.* **үртәү** 1. *Кый үртәшеү.*

**2.** *күсм.* Үҙ-ара бер-береңде үртәү. *Үртәшеп ултырыу.*

**ҮРҺӘЛӘНДЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **үрһәләнеү**. *Хатка яҙылғандарҙы йәһәтерәк белергә ашкыныу һәр береһенең күңелен үрһәләндереп, тиҙерәк ауылға кайтырға ашкындырҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҮРҺӘЛӘНЕҮ** *к.* Берәй эш-хәлдән тыныcһыҙланып, ярһып, ни эшләргә белмәү. *Үрһәләнеп илау.* ■ *Ул [Заман] яңағы ауыртканға түҙә алмай, төнө буйы үрһәләнеп сыкты.* Ә. Вәли. *Телдән яҙып торған Мәһира, башка һүҙ белмәгәндәй, үрһәләнеп тағы ла «Ялған!» — тип кыскырҙы.* Х. Ғиләжев. *«Тағы мин борсойом, мин шылтыратам. Катынымдың хәле нисек? Әйтегеҙсе, зинһар!» — тип үрһәләнде Байназаров.* Х. Зарипов.

**ҮРӘ** *р.* **1.** Төп-төҙ булып үргә күтәрелгән хәлдә. *Үрә катыу.* ■ *Аттар ауыҙлыктарын сәйнәп, .. үрә тора.* Ә. Вахитов.

**2.** Туп-тура үргә табан. *Башты үрә сөйөү. Үрә карау.* ■ *Машиналар .. ауыр бышкырып бара. Алғы тәгәрмәстәре үрә күтәрелә.* Я. Вәлиев. *Моряк шыуа граната һуҙып, канлы терһәгенә таянып, үрә баҫырға бик теләй ҙә бит, мөмкин түгел, юк бер аяғы.* Т. Арслан.

♦ **Сәс үрә тороу** куркыштан кот осоу. *[Рәистең:] «Айыу!» — тип кыскырып ебәргәнен ишетеп, сәстәр үрә торҙор.* Н. Мусин.

**ҮРӘДНИК** [*рус.* урядник] *и. тар.* **1.** Батша армияһының казак ғәскәрендәге унтер-офицер.

**2.** Революцияға тиклемге Россияла өйәҙ полицияһындағы түбәнгә дәрәжә.

**ҮРӘЛӘҮ** *к. диал. кар.* **кешәнләү** 1. *Атты үрәләп ебәреү.*

**ҮРӘПСЕНЕҮ** *к. кайт. кар.* **үрәпсеү**. *Тышта егеттәрем көтә, үрәпсенеп тора толпарҙар.* М. Тажи.

**ҮРӘПСЕТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **үрәпсеү**. *Өлкәман бай котороноп, атын үрәпсетте.* Ш. Насыров.

**ҮРӘПСЕҮ** *к.* Сапсынып, үрә һикереү (атка карата).— *Эй, малай, ат алдына килмә, хәҙер тапалаһың бит! — тип күсерҙең кыскырыуына карамаҫтан, Азамат үрәпсеп торған аттың теҙгенен тотто ла алды.* Й. Мостафин. *Алпамыша .. ярһып, үрәпсеп торған буҙ толпарға менеп, яурынына кош ултыртып, Әйләр хан ғәскәренә каршы һуғышка китте, ти.* «Алпамыша».

**ҮРӘСӘ** *и.* Арба йәки сананың ике яклап буй һалынған өҫкө ағасы. *Акйондоҙ иренә арка биреп, арбаның ситенә генә, үрәсәһенә генә ултырҙы.* М. Кәрим. *Туры ат йәнфарман алға саба. Тыйып алыр әмәл юк. .. Өмәт сананың үрәсәһенә йәбешеп барыуын ғына белде.* Д. Юлтый. *Йәшел генә сана, еҙ үрәсә, еҙ үрәсәгә ятып һөйләшә* (Халык йырынан).

**ҮРӘТ** *с. диал. кар.* **сығынсы** 1. *Үрәт ат.*

**ҮРӘШӘН** *р. диал.* Бик, ифрат. *Үрәшән бай кеше.*

**ҮС** *и.* Яманлыкка яманлык менән яуап биреү теләге. *Үс тотоу. Үс һаклау.* ■ *Яңғырай байҙарға каршы эшселәрҙең үс өнө!* Д. Юлтый. *Үсем таша ошо яҙаларға, ни эшләргә, нимә кылырға?* Т. Арслан. *Якшы әҙәм билдәһе: асыу менән үсе юк.* (Кобайырҙан). **Үс алыу** (*йәки* **кайтарыу**) асыу итеп, яманлыкка каршы яманлык эшләү. *[Шакир:] Байҙарҙың үсе бар советта, бай менән мулла үс алырға тырыша.* А. Карнай.

♦ **Үс итеү** асыу итеү, асыуланыу. *Ире ташлап киткән дә, был катын үға үс итеп, үкырға керешкән.* С. Агиш. **Үс иткәндәй** бер эш-хәлгә ниҙер кире килеп торғанда әйтелә. *[Әхмәт:] Ашарыңа аҙ булһа, кейемең алама булһа, үс иткәндәй, яҙы ла бик һуңлап килә торған.* М. Тажи. **Үс каныу** 1) күңел булырлык итеп, үсте кайтырыу. *Хәлимә ярһыуы баҫылғанса, үсе канғанса әйтте.* Һ. Дәүләтшина; 2) күңел булырлык итеп, танһыкты кайтарыу. *Үс канғанса һөйләшеү. Үс канғанса сәй эсеү.*

**ҮСЕГЕҮ** (үсек*ә*) *к.* Кемдеңдер һүҙен йәки эш, кылығын ауырға алып, асыуланыу; үпкәләү. *Үсегеп китеү. Үсегеп йөрөү.* ■ *[Амуров:] Нисек инде, балалар кеүек үсек тә бер йылға якын ятып йөрөгән кыҙыңды урам уртаһында ташлап калдыр ҙа кит имеш.* Н. Мусин.

♦ **Үсеккән кеүек** *йәки* **үсеккән өҫтөнә** бер эш-хәлгә ниҙер кире килеп торғанда әйтелә; карышкан кеүек. *[Тансала] аяктарҙы тигеҙ алыу өсөн вак-вак баҫып, аяктарҙы тыпырлатып, шыуыштырып алабыҙ. Ләкин ундай вакытта, үсеккән кеүек, аяктар тиҙ генә тыңламай.* Д. Юлтый.

● *Беткә үсегеп, туның утка яккан.* Мәкәл.

**ҮСЕГЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **үсегеү**. *Үсегешеп йөрөү.*

**ҮСЕКЛӘҮ** *к.* Төрлө һүҙ йәки кыланыш менән үртәү. *Люся Костяны үсекләп, телен сығарҙы.* Р. Низамов. *Кусәкте үсекләйҙәр, кыпсак һин, тип, дым тарттиһә, бүртә торған борсак һин, тип.* «Бабсак менән Күсәк».

**ҮСЕКЛӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **үсекләү**. *Үсекләшеп тороу.*

**ҮСЕКСӘН** *с.* Һүҙ күтәрмәй, шаяртҡанды ла аңламай, үсегеп барыусан. *Үсексән бала.* ■ *Мостафа бик үсексән кеше ине. ... «Биргән ризығыңды ауыҙымдан тартып алыр булғас, ниңә сакырҙың? Ҡайтам!» — тип ғауғаланы ла китте.* Н. Мусин.

**ҮСЕКТЕРЕҮ** *к.* Берәй төрлө юл менән йәнгә тейеп үртәү, асыуҙы килтереү. *Ул [Гөлйөҙөм] Айбулаттың «малай булһын, ҡыҙ булмаһын» тип юрамал үсектереүен иҫенә төшөрҙө.* Һ. Дәүләтшина. *[Тәнзилә әбей:] Айыу мыҫтыҡлы кешене яратмай, уны үсектерергә ярамай.* М. Тажи.

**ҮСЛЕ** *с.* **1.** Үс һаҡлап, асыу тотоп йөрөгән. *Бына килер бер көн, фронт айҡап, үсселәрҙең барыһын йығырмын.* Ғ. Амантай.

**2.** Үс менән һуғарылған. *Йөрәгемдән сыҡҡан һөйөү йыры халҡым күңеленә юл тапһа, көйҙөрөүсе, үсле һүҙҙәр менән дошман сафтарына уҡ атһам.* Ғ. Әмири.

● *Көслөнән ҡурҡма, үсленән ҡурҡ.* Мәҡәл.

**ҮСЛЕК** *и.* Асыулы, үсле яман ниәт; хаслыҡ. *Үслек ҡылыу. Үслек уйлау.* ■ *Их, һеҙ, зәңгәр ҡапка! .. Һеҙгә булған бөтә үслек минең күкрәктә юйылмаҫлыҡ булып яҙылған.* Ғ. Амантай.

**ҮСЛӘШЕҮ** *к.* Үс булыу, үс тотоу. *Айырым кешеләр Заһитҡа үсләште. Иҙел башына барырға өндәгән өсөн уны үҙ милләтенә, ауылдаштарына хыянат итеүҙә .. ғәйепләнеләр.* Я. Хамматов. *Булмаҫтай менән үсләшеп, яуға ҡаршы яу сабыр батыр-батыр ирҙәр бар* (Ҡобайырҙан).

**ҮСӘҮ** *к.* Кемделер бер уңышһыҙлығы йәки хатаһы өсөн кинәнеп, үсекләү. *[Тимергәле — Үмәргә:] «Ҡыҙҙы тәүҙә бирмәгәйнең, хәҙер ул беҙҙең ҡулда»,— тигән уй менән һине үсәйек тип килмәнек.* Һ. Дәүләтшина. *Көрәк һабы уның [Мөнирәнең] бармаҡ төртәрен күберсетеп тә өлгөргәйне. „Бына һиңә шул кәрәк! Ҡабат маҡтанмаҫҡа яҡшыраҡ булыр!» — тип Шаһғәли эсенән генә үсәне.* Ш. Янбаев.

**ҮСӘШЕҮ** *к.* Үҙ-ара бер-береңде үсәү.

**ҮҪЕМЛЕК** *и.* Ғәҙәттә хәрәкәтһеҙ хәлдә үҫеп, һауа һәм тупраҡтың органик булмаған һәм органик матдәләре менән туҡланып, органик булмағандан органик матдәләр булдырыуға һәләтле организм. *Ҡыуаҡ үҫемлектәр. Ауыл хужалығы үҫемлектәре.*

**ҮҪЕНДЕ** *и. кар.* үҫенте.

**ҮҪЕНДЕРЕҮ** *к.* Маҡтап, хуплап маһайтыу; осондороу. *Баланы үҫендереү.* ■ *[Рәхимйән:] Өҫтәүенә .. ҡыҙыма бер нисә мең һумлыҡ бүләк алдым. [Орҡоя:] Бер ҡыҙға шул тиклем әйбер! .. Бының менән һеҙ уны бик үҫендерәһегеҙ түгелме?* Н. Иҙелбай.

**ҮҪЕНЕҮ** *к.* Маҡтағанға, хуплағанға маһайыу; осоноу; ҡупайыу. *Үҫенеп китеү.*

**ҮҪЕНТЕ** *и.* **1.** Үҫемлектең һабаҡтан йәки тамырҙан сыҡҡан яңы яралғыһы. *Ҡара ерҙе быйыл ғына төртөп сыҡҡан бер ҡайын үҫентеһен, тупрағы менән аҡтарып, кәберҙең баш осона ултырттым.* Ә. Вахитов. *[Сәлим:] Шытып сыҡҡан һәр үҫенте, тейешле шарттар булһа, үргенләп китә ул.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** Үҫемлектең түңгәктән йәки ағас төбөнән үҫеп сыҡҡан яңы яралғыһы. *Ҡырҡылған бер ағастың төбөнән яңы ғына үҫентеләр ярып сыҡҡан.* М. Тажи.

**3.** Баҡсала, паркта һ. б. ерҙә ултыртыу өсөн үҫтерелгән йәш үҫемлек; үрсетмәлек. *Емеш ағастары үҫентеләре.* ■ *Ул [Аҡъюловтың таныштары] ҡарағат үҫентеләре һалынған ҙур тоҡ күтәргән, ҡултыҡ аҫтына ҡурай еләге үҫентеләре бәйләмә ҡыҫтырғайны.* Ә. Вәли.

**4.** *кар.* үренде.

**ҮҪЕҮ** *к.* **1.** Тереклек итеү барышында бейегерәк, оҙонораҡ, ҙурыраҡ булыу, ҙурайыу (кеше, хайуан, үҫемлек һ. б. ҡарата). *Буйға үҫеү. Ҙур булып үҫеү.* ■ *Ғәйни ағай менән Хәсби апай бәләкәс тура бейәне еген, .. дуға бейеклеге булып елберләп үҫкән ашлыҡ араһынан киң баҫыуға ҡарап йүнәлде.* Т. Йәнәби.— *Булат үҫеп ҙурайғас, уға үҙенең нисек атлап киткәнен һөйләһәң, үҙә лә ышанмаҫ әле.* М. Тажи. *Үҫә-үҫә ҡашҡа быҙау ҡашҡа һыйыркай булыр.* Ғ. Амантай./ Ҙур кеше булыу, балиғ булыу. *Егет булып үҫеү.* ■ *Ике йәшлек тәтелдәк ҡыҙ ине ул Зөлхизә. Хәҙер ун һигеҙ. Һай, уҙған ғүмер. Үҫте шул ҡыҙ, үҫте.* З. Биишева. *Йылдар үтә. Күсәк, Ҡарағөлөмбәткә нәфрәтләнеп, үҫә бирә.* «Бабсаҡ менән Күсәк»./ Балалыҡ, йәшлек йылдарын ҡайҙалыр, ниндәйҙер шарттарҙа үткәреү. *Йәтим үҫеү.* ■ *[Әсә — балаларына:] Беҙ бер итәктә бишәү үҫтек, бер ҙә генә талашмай торғайныҡсы.* С. Агиш. *Зәйнәп яңғыҙ әсәһендә үҫте. Колчак һуйған уның атаһын.* Ғ. Сәләм./ Бала саҡта, балалыҡ йылдарында ниндәйҙер булыу. *Теремек ҡыҙ булып үҫеү. Уйсан малай булып үҫеү.* ■ *Бала мыжыҡ холоҡло, үҙһүҙлерәк булып үҫте.* М. Тажи.

**2.** Барлыҡҡа килеп, оҙонайыу (сәс, теш кеүек нәмәгә ҡарата). *Теш үҫә. Йөн үҫә. Сәс үҫә.* ■ *[Йәнтимерҙең] өҫкө ирене өҫтөнә үҫкән бәпкә йөндәре лә хәҙер мыйыҡ кеүек булып күренә.* С. Агиш./ Барлыҡҡа килеп, ҙурайыу. *Ҡорһаҡ үҫә. Оро үҫә.* ■ *Томбойоҡтай күкрәге күпереп үҫеп ҡалҡыған һылыуыңды яуыз зат алыр* (Ҡобайырҙан).

**3.** Күләм, дәүмәл, һан яғынан артыу. *Талап үҫә.* ■ *Кем белә, бәлки бер нисә йылдан Ҡолсора ҡала булып үҫеп китер.* Б. Бикбай. *Үҫкән һайын шатлыҡ үҫә бара, шуға күңел ярһып шашына.* Ғ. Амантай./ Ныҡыраҡ, көслөрәк була барыу (тойғоға, үҙенсәлеккә, хәлгә һ. б. ҡарата). *Халыҡ араһында һуғышҡа ҡаршы рух үҫә. Эшселәр араһында революцион хәрәкәт көсәйә.* Д. Юлтый.

**4.** Кимәл, дәрәжә йәһәтенән күтәрелеү. *Аң үҫә.* ■ *Кисә шәкерт булған егеттәр ҙә профессорҙар булып үҫәләр.* Х. Ҡунаҡбай. *Беҙҙә кешеләр үҫә, яңы кеше.* Ғ. Сәләм. / *күсм.* Хәстәрле мөнәсәбәт арҡаһында барлыҡҡа килеү. *Кадрҙар үҫә.*

**5.** Тормош барышында камиллашыу. *Сәнғәт үҫә. Хужалыҡ үҫә.* ■ *[Һөнәрсе] һәр ваҡыт эҙләнгән, өйрәнгән. Шуға, ахыры, ул үҙ һөнәрендә көндән-көн үҫкән, камиллашҡан.* З. Биишева. *Йәмғиәттең үҫеүе объектив законға буйһонған.* «Совет Башҡортостаны», 1970,

27 февраль./ *күсм.* Ниндәйҙер шатлыҡ, ҡәнәғәтләнеүҙән күңелләнеү, маһайыу. *Нәфисә был [йылы] һүҙҙәрҙе ишетеү менән үҫеп китә.* Н. Асанбаев.

**6.** Берәй ерҙә таралыу (үҫемлектәрҙең, ағастарҙың айырым төрҙәренә ҡарата). *Диңгеҙҙәрҙә ылымыҡтар үҫә. Тундрала мүк һәм лишайниктар үҫә. Уралда үҫкән ағастар.*/ Ҡайҙалыр булыу, бар булыу (үҫемлеккә ҡарата). *Күк салт аяҙ, тып-тын. Ситән буйында үрмәләп үҫкән кесерткән дә, япраҡтары ла ҡуҙғалмай.* Т. Йәнәби. *Урал яландарын биҙәкләп, сук-сук булып үҫә миләүшә.* Ғ. Амантай.

**ҮҪЕШ** *и.* **1.** Үҫеү барышы. *Үҫемлектең үҫеше. Үҫеш дәүере.*

**2.** Кимәл, дәрәжә йәһәтенән күтәрелеү барышы. *Аң үҫеше. Көрәштең үҫеше.*

**3.** Бер хәлдән икенсе хәлгә күсеп, камиллашыу барышы. *Культураның үҫеше. Промышленность үҫеше. Үҫеш диалектикаһы.*

**ҮҪЕШЕҮ** *к.* Үҫеү барышында билдәле бер кимәлгә етеү. *Үҫешкән социализм.*

**ҮҪЕШЛӘНЕҮ** *к. кар.* **үҫешеү.**

**ҮҪКЕЛЕК** *и. кар.* **оҫҡолоҡ.**

**ҮҪКЕРЕМ** *и. диал.* Үҫмер.

**ҮҪКӘРЕҮ** *к. диал.* Үҫтереү.

**ҮҪМЕР** *и.* Үҫеп, етеп килгән бала. *Йәш үҫмер.* // *Үҫмер бала. Үҫмер ҡыҙ. Үҫмер малай.* ■ *Үҫмергә түгел, олоға шомло була яңғыҙ юл.* С. Кулибай.

**ҮҪМЕРЛЕ** *с. диал.* Үрсемле.

**ҮҪМӘЛЕ** *с.* Үҫеү, ҙурайыу дәүерендәге. *Үҫмәле бала.*

**ҮҪТЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **үҫтереү.** *Үҫтерелгән иген.*

**ҮҪТЕРЕМ** *и. диал.* Үҫмер.

**ҮҪТЕРЕҮ** *к.* **1.** Ҡарап, тәрбиәләп, кемдең йәки ниҙеңдер тейешле кимәлгә үҫеп етеүен тәьмин итеү, булдырыу. *Балалар үҫтереү. Үрсетмә үҫтереү.* ■ *[Хафиз ҡарт — йәштәргә:] Һеҙ, бер баланы нисек итеп үҫтереп, кеше итербеҙ, тип ҡайғырышҡанға аптырап та ҡуям.* М. Тажи. *Көтөүҙә уның [Зөлхизәнең] бәләкәс кенә бәрәс сағынан уҡ үҙе ҡарап үҫтергән аҡ ҡушҡар тәкәһе бар икән.* Н. Иҙелбай. *Хәйер, беҙҙең тормош алда әле, үҫтерербеҙ роза гөлдәрен.* Ғ. Сәләм.

**2.** Барлыҡҡа килтереп, оҙонайырға, үҫергә мөмкилек биреү (сәс, һаҡал, мыйыҡ кеүек нәмәне). *Сәс үҫтереү. Мыйыҡ үҫтереп ебәреү.* ■ *[Һыуһылыу:] Айыры һаҡал үҫтергән Сәмәр хандыр атайым.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**3.** Күләм, дәүмәл, һан йәһәтенән арттырыу. *Производство кеүәттәрен артабан үҫтереү.* ■ *Моратша бай мәһәрҙе тағы утыҙ һумға үҫтергән.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Кимәл, дәрәжә йәһәтенән күтәреү. *Аңды үҫтереү.* ■*Хужабикә улының белемен үҫтереү өсөн гөмүмән аҡса йәлләмәй торғайны.* С. Агиш. / *күсм.* Хәстәрле мөнәсәбәт менән барлыҡҡа килтереү. *Кадрҙарҙы үҫтереү.— Ана Петроград. Революцион пролетариатты үҫтергән бишек.* Һ. Дәүләтшина.

**5.** Кем йәки ниҙеңдер үҫеүенә, камиллашыуына булышлыҡ итеү. *Сәнғәтте үҫтереү. Талантты үҫтереү.* ■ *Халыҡ ижады баланың образлы фекерләүен үҫтерә, фантазияһын байыта.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1971, № 7.

**ҮҪТЕРЕШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **үҫтереү** 1. *Бала үҫтерешеү. Йәшелсә үҫтерешеү.*

**ҮҪӘРГӘН** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**ҮҪӘРМӘН** *с. иҫк. кар.* **үрсемле.** *Мәйтән улы Үҫәргән, нәҫеле булған үҫәрмән.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ҮТ** *и.* Бауырҙа эшләп сығарылып, эсәккә барған йәшкелт һары төҫтәге эсе шыйыҡлыҡ. *Үт юлы. Үт ҡыуығы.*/ Шул шыйыҡлыҡ йыйыла торған ҡыуыҡ. *Үте шартлаған.*

◆ **Үтен һытып алыу** хаҡты-ниҙе оят белмәй самаһыҙ ҙур алыу. *[Бикйән ағай] хатта яҙғы өҙөктә лә ике-өс сана [бесән] һатып ебәрә. Хаҡын инде, кеше әйтмешләй, үтеңде һытып ала.* Р. Солтангәрәев. **Үтеңде һытыр** бик эсе нәмәгә ҡарата әйтелә. *Ҡатығы бигерәк эсе, үтеңде һытыр.* **Үт һыуын эсереү** нужа күрһәтеү; нужа һурпаһы эсереү.

**ҮТЕК** [*рус.* утюг ‹ *төрк.*] *и.* Йыуылған кер, кейем-һалымдың сырышын яҙыу, шымалау өсөн ҡулланылған прибор. *Үтекте ҡыҙҙырыу. Үтек менән үтекләү.*

**ҮТЕКЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **үтекләү.** *Үтекләнгән кейем.* ■ *Әсәйемдең ҡулдары менән һуғылған киндер таҫтамал! Ул таҙа итеп йыуылғайны, үтекләнгәйне.* Ғ. Аллаяров.

**ҮТЕКЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **үтекләү.** *Кейемде үтекләтеү.*

**ҮТЕКЛӘҮ** *к.* Эҫе үтек менән ышҡып шымартыу. *Кер үтекләү. Үтекләп кейеү.* ■*Таһирҙың эсәһе бер нисә лимон, әфлисун, бер һауыт йөҙөм, бик һәйбәтләп үтекләп, дүрткә бөкләнгән аҡ яулыҡ тотоп, өҫтәл янына килде.* Р. Ғабдрахманов.

**ҮТЕКЛӘШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **үтекләү.** *Кер үтекләшеү.*

**ҮТЕЛЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **үтеү**[1] 1. *Үтелгән юл.*

**2.** *әйһ. ф. кар.* **үтеү**[1] 1. *Күп юл үтелде.*

**ҮТЕМБЕЙ** *с. һөйл.* Бик эрһеҙ. Үтембей кеше.

**ҮТЕМЛЕ** *с.* **1.** Ашау, эсеүгә еңел, ашау йәки эсеүгә теләк уятырлыҡ, яҡшы ашалыусан; барымлы. *Үтемле аш.* ■ *Уның [Гөлбикә апайҙың] ҡулынан сәй ҙә тәмле, үтемле була.* Д. Юлтый. *Гөлгөнә бешергән тауыҡ бик үтемле булды.* Ш. Янбаев.

**2.** Һатыуҙа еңел үтеүсән, тиҙ һатылыусан. *Үтемле тауар.* ■ *Улар [Ташбатҡан халҡы] тәгәрмәс туғыны, һалабаш, дегет кеүек үтемле әйберҙәр тейәп, ҡалаға бара.* Ж. Кейекбаев.

**3.** *күсм.* Кеше күңеленә ятышлы; йоғонтоло. *Үтемле итеп һөйләү.* ■ *Фәрзәнә эше менән дә, һүҙе менән дә иптәштәренә өлгө була ала. Шуға күрә йәштәр араһында уның һүҙе үтемле, колхозда һәр кем уның һүҙенә ҡолаҡ һала.* Х. Кәрим.

**ҮТЕМҺЕҘ** *с.* **1.** Ашау, эсеүгә ауыр; барымһыҙ. Үтемһеҙ яҙыҡ.

**2.** Насар һатыла торған. *Үтемһеҙ тауар.*

**3.** *күсм.* Кеше күңеленә ятышһыҙ; йоғонтоһоҙ. *Үтемһеҙ һүҙ.*

**ҮТЕНЕС** *и.* Үтенеү мөрәжәғәте. *Үтенес белдереү. Үтенес тапшырыу.* ■ *[Егет:] Үтенесем шул, батыр, минең һиңә: шул ҡыҙҙы ҡатынлыҡҡа һоратамын.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ҮТЕНЕҮ** *ҡ.* Ниҙер эшләтеү, нимәгәлер ирешеү теләге менән кешегә түбәнселекле рәүештә мөрәжәғәт итеү. *Ғәфү үтенеү. Үтенеп әйтеү. Үтенеп һорау.* ■ *Үтенмә лә Таңһылыу, ай үтенмә, ебәрмәйем тотҡан беләктән* (Халыҡ йырынан).

**ҮТЕП-СҮТЕП: үтеп-сүтеп йөрөү** тегеләйбылай үтеп йөрөү. *Үтеп-сүтеп йөрөгән кешеләрҙе күҙәтеп, бер урында оҙаҡ баҫып торҙом.* Д. Юлтый.

**ҮТЕС** *и.* Кире ҡайтарыу шарты менән бирелгән һәм алынған нәмә. *Үтескә алыу. Үтесте түләү.* ■ *Биш-алты бот кешенән алып торолор. Үтескә алыу ҡыйын да бит, ни эшләтәһең, башыңды ташҡа бәреп булмай.* Б. Хәсән. *[Айҙар] урман яғындағы бер колхоздан үтескә өс-дүрт сана бесән тапты.* Ф. Мансуров. *Йомошоң төшһә, күрше-күләндәрең биреп сығаралар үтескә. Ә шиғырҙы күршеләргә кереп, һорап алып булмай үтескә.* М. Тажи. **Үтескә ҡалдырыу** үҙ мәлендә ниҙелер тейешенсә үтәмәй ҡалыу. *Стәрле мәҙрәсәһендә уҡып йөрөгән сағында бер һорауға ун яуап биргәнлеге, бер нәмәне лә үтескә ҡалдырырға теләмәгәнлеге өсөн уны [шәкертте] «бомба» тип йөрөтәләр ине.* И. Насыри.

♦ *Үтес араһына һыу инмәҫ.* Мәҡәл.

**ҮТЕҮ**[1] *ҡ.* **1.** Кем йәки нимәнеңдер эргәһенән юл алыу, ҡайҙалыр барыу, китеү; уҙыу. *Балалар үтеп китте. Өй эргәһенән үтеү. Урамдан үтеү. Яр буйлап үтеү.* ■ *Урамда ни тиклем кеше! Артҡа ла үтәләр, алға ла үтәләр. Ҡыҙыу ҙа үтәләр, аҡрын да үтәләр.* С. Агиш. *Баҡсабыҙ үткәндә ҡыҙҙар хуш еҫен куплап сәсә.* Ш. Бабич./ Хәрәкәт итеп, күпмелер араға күсеү. *Әҙерәк үтеү.* ■ *Тау һырлатып ятҡан берләм һуҡмаҡ менән бер-ике саҡрым үткәс, алда асыҡлыҡ күренде.* Ә. Вахитов./ Бара ятҡанда урынды, араны артта ҡалдырыу, уҙыу. *Күп ер үтеү. Күперҙе үтеү. Урманды үтеү. Яланды үтеү.* ■ *Беҙ фронт буйынса Польша, Белоруссия, Украина ауылдарын үттек.* Д. Юлтый. *Шишмәне күргәс, Сәғиҙә шикләнә төштө.— Инәй, килгән саҡта беҙ был шишмәне үтмәгәйнек бит, яңылыш яҡҡа китеп бармайбыҙмы икән?* М. Тажи.

**2.** Етеҙерәк хәрәкәт менән артҡа ҡалдырыу, алға сығыу; уҙыу. *Дуҫым аты мине үтһә, теҙгененән алмам һис.* М. Илбаев./ Эш, ҡылыҡта алға сығыу; уҙыу. *Атаһынан үтеп бер нәмә лә эшләй алмай.*

**3.** Хәрәкәт итеп, ары юл алыу (транспортҡа ҡарата йәки шуларҙың береһендә), уҙыу. *Поезд үтте.* ■ *Хәйҙәр поездан төштө. Тап ошо минутта пароход та Ағиҙелдең текә яры буйлап үтеп китте.* М. Тажи. *Малайҙар саҡ юлдан ялтанып ҡалды, ҡырандас эргәләренән жыулап үтеп китте.* Б. Бикбай./ Хәрәкәт итеп, артабан китеү (пуля, снаряд һ. б. ҡарата); уҙыу. *Баш осонан һауаны ярып, снарядтар выжлап үтте.* Д. Юлтый./ Ҡыҫҡа ваҡытҡа барлыҡҡа килеү (берәй төрлө һиҙеүгә, хискә, хәлгә һ. б. ҡарата). *[Тимерҙең] арҡаһынан ваҡ бөрсөктәр сәнскеләп үтте үтеүен, ләкин ул аҙ ғына ваҡытҡа булып алды, егет юғалтманы үҙен.* Б. Бикбай./ *күсм.* Үҙенең эҙмә-эҙлегендә кемдең дә булһа хыялында барлыҡҡа килеү, күҙ алдына баҫыу. *Сейәбикәнең башынан әллә ниндәй ҡурҡыныс уйҙар үтә.* Т. Хәйбуллин. *Ғәйни ағайҙың йәш саҡтары, егет саҡтары, нужа күреп йөрөгән саҡтары бер-бер артлы күҙ алдынан теҙелеп үтте.* Т. Йәнәби.

**4.** Билдәле бер сик, һыҙыҡ һ. б. аша, үтә алға барыу йәки китеү, сығыу. *Сиктән үтеү. Һыҙыҡ аша үтеү.* ■ *Ошонда кесе йәштән үҫеп тә был өйҙөң коридорынан ары үтә алмаған Вася.* Һ. Дәүләтшина. *Таш диуарҙар бейек, хикмәтле, дошман түгел, ҡош та үтмәҫлек.* М. Кәрим./ Размеры буйынса нимәләр аша йәки нимәнеңдер эсенән алға барырлыҡ, сығырлыҡ, китерлек булыу. *Шкаф ишектән үтмәне.* ■ *Сәйнәй, сәйнәй, ә ит һаман таш кеүек, йота башлаһаң, тамаҡтан үтмәй.* Ә. Чаныш.

**5.** Һеңеп, һарҡып һ. б. аша сығыу. *Ямғыр үтә икән. Ҡыйыҡты яңыртырға кәрәк булыр, тип уйланы [Кәрим].* Я. Хамматов. *Дошман пуляһы Фатиманың уң яҡ беләнән үтеп, бөйөрөнән өҫтәрәк ултырған.* Б. Бикбай. *Сергеһенән ҡан үтмәй, батыр булып, дан тотмай аттан әйәр алмаҫтар* (Ҡобайырҙан). *Таналыҡҡай буйы ай аҡ ҡамыш, киблаларҙан өргән ел үтмәй* (Халыҡ йырынан)./ *күсм.* Йәнгә, тәнгә тәьҫир итеү. *Ел елеккә үтә. Тауыш мейегә үтә.* ■ *[Тимеркәйҙең] аяғына ҡаты бер нәмә бәрелде. Йөрәгенә үтте.* Д. Юлтый. *Яфаланып ятҡан күк атымдың ыңғырашыуы електәремә үтте.* Б. Ишемғол. *Уҙған гүмеремдең аҙаптары уҙәгемә үткән шул ҡәҙәр!* Ғ. Мәсғүт.

**6.** Берәй йүнәлештә һуҙылыу (юлға, туннелгә һ. б. ҡарата). *Ер аҫтынан торба үтә. Тау битләп һуҡмаҡ үтә.* ■ *Киң, тигеҙ ялаңды ҡырҡып үткән оҙон, һай, йәйпе йылға буйына Ялпаҡйылға ауылы ултырған.* Ғ. Дәүләтшин.

**7.** *һөйл.* Тауыш биреү, һайлап алыу һ. б. һөҙөмтәһендә ҡабул ителеү, алыныу, һайланыу. *Комиссиянан үтеү. Тәҡдим бер тауыштан үтте. Штатҡа үтеү.* ■ *Маһира ... пединститутҡа экзамен тапшыра барғайны, конкурстан үтә алмай ҡайтты.* Ф. Иҫәнғолов.

**8.** Нимәгәлер дусар ителеү, ниҙер кисереү, татыу. *Ауырлыҡтарҙы үтеү. Күпте күреп үтеү.* ■ *Юламан ҡарт, ни өсөндөр, Ирйегетте артыҡ ярата, хөрмәт итә. Бығаса уның менән бергәләп ауыр һынау үтеп карамаһа ла уға үҙенә ышанған кеүек ышана.* З. Биишева. *Яҡшы кеше маҡтанһа, утын, һыуын үттем, тир* (Ҡобайырҙан). / Иҫәпкә, ҡаралыуға, тикшереүгә дусар булыу. *Аттестация комиссияһынан үтеү. Материалдар регистратуранан үткән.* ■ *Некруттар ҙа йөрөмәй бөгөн. Улар кисә, Тимер үҙе лә күреп ҡалды, район үҙәгендә комиссиянан үтте.* Б. Бикбай.

**9.** Дауам итеп, артта ҡалыу (ваҡытҡа, ваҡиғаға һ. б. ҡарата); уҙыу. *Ғүмер үтә. Йыл үтә. Ҡыш үтә.* ■ *Күп тә үтмәй, ҡыуаклыҡ аръяғынан тыны бөтөп көтөүсе Ҡолҡай йүгереп килеп еткән.* Н. Иҙелбай. *Һыҙғырт, ҡурай, үткән*

*кайғыларҙы!* Ш. Бабич. *Һинән йәшлек үтте, минән дә ул үтер әле һуңлап булһа ла.* Н. Нәжми./ Ғәмәлдә булып, берәй төрлө һөҙөмтә менән тамамланыу, бөтөү. *Түй гәҙәттәге йола буйынса үтмәне.* ■ *Дәрес күңелһеҙ үтте.* М. Тажи. *Кисә кыҙык үтә. Иҫке дуҫтар шулай йыйылышкан мәлдәрҙә үткән көндө улар хәтерләй.* Ғ. Сәләм. *Бик тә һәйбәт үтте майҙан, булманы тик рәтлерәк.* Ш. Бабич.

**10.** Берәй төрлө курсты, срокты бөтөрөү, тамам итеү. *Дауалау курсын үтеү. Практика үтеү. Хәрби хеҙмәтте үтеү.* ■ *[Зыя:] Бәлки туранан-тура фронтка оҙатмаҫтар әле, бер нисә ай лагерҙа булырға, әҙерлек үтергә лә тура килер.* М. Тажи.

**11.** *һөйл.* Уҡып өйрәнеү өсөн дәрес рәүешендә башкарыу, ниҙелер уҡып өйрәнеү. *Мәктәп программаһын үтеү.* ■ *— Әсәй, зверинецка барырға акса бир әле. Беҙ бит зоология үтәбеҙ, беҙгә уны уҡытыусы ла карарға кушты,— тине Ғүмәр.* С. Агиш.

**12.** Булып тамамланыу, туктау. *Һығыш булып үтте. Ямғыр тиҙ үтте.* ■ *Берәй ергә тукталып, ямғыр үткәнсе ышыкланып торорғамы әллә, тип, Орҡоя тирә-яғына каранды.* Ғ. Ибраһимов. / *һөйл.* Ауыртыуҙан туктау. *[Карт:] Бынауы ауырткан аякты ипһеҙерәк баҫып эйҙем. Әҙерәк кайырыла төштө, бот төбөн шаңкытып ебәрҙе. Үтер ул, үтер.* М. Тажи.

**13.** Билдәле бер үлсәү, сик, саманан ашыу; уҙыу. *Ауырыуы йүнәлеүҙән үткән. Буйы атаһынан үткән.* ■ *Урта йәштәрҙән үтеп, башына сал инә башлаған Әпләс, йәһәт атлап, муллаға китте.* Һ. Дәүләтшина. / *күсм.* Йән биреү. *Таң алдынан үтеү.* ■ *Олатайым уның [әсәйемдең] һалынып төшкән кулын күкрәгенә күтәреп һалды, эйелеп йөрәген тыңлап караны ла: — Үтте,— тине.* Ғ. Ғүмәр.— *Мәзин икенсе тапкыр ясин сыға. Иман менән генә үтһен инде, бисара,— тип шыбырлай Сыуакай әбей.* З. Биишева.

**14.** *күсм.* Сауҙалы булыу; һатылыу. *Әре биҙәкле ситсаның кем белмәй якшы үткәнен?* С. Агиш. *[Биксән] түшкәләрен тейәй ҙә китә кала баҙарына. Кире алып кайтһа кайта, һорағанынан төшмәй. Был юлы үтмәһә, киләһендә үтә ул барыбер.* Р. Солтангәрәев.

**15.** *-п* формаһындағы төп мәғәнәне йөкмәгән ҡылымға ҡушылып, ниҙелер эш, һүҙ һ. б. ыңғайында башкарғанды белдерә. *Аңлатып үтеү. Иҫкә төшөрөп үтеү. Таныштырып үтеү. Әйтеп үтеү.*

◆ **Теш үтеү** *кар.* **теш**[1]. **Үтеп сығыу** үткер, әрһеҙ тәбиғәтле булыу. *Үтеп сыккан кеше.* **Үтә барһа** күп тигәндә, иң күбе. *Үтә барһа ун сакырым ер.* **Һүҙ үтеү** *кар.* **һүҙ.**

● *Таяк иткә үтә, һүҙ һөйәккә үтә.* Мәкәл. *Үткән эштән төш якшы.* Мәкәл.

**ҮТЕҮ**[2] *к.* Якшы кыркыу йәки тишеү. *Балта үтә. Беҙ үтмәй. Бысҡы үтә. Кайсы үтә. Салғы үтмәй.* ■ *Мәғфүрә бысакты каҙан ситенә шыйылдатып бер нисә тартып яныны ла Рәхимәгә кире һуҙҙы: — Үтә шикелле.* Һ. Дәүләтшина.

◆ *Үҫмәгән бойҙайға үтмәгән урак.* Мәкәл.

**ҮТЕШЛӘЙ** *р.* Үтеп барғанда, юл ыңғайында. *[Шофер:] Ярай, мин хәҙер үтешләй идараға һуғылып, әйтеп китермен.* Р. Солтангәрәев.

**ҮТИ-ҮТИ** *сакр.* Өйрәкте саҡырыу һүҙе. *Раушл: «Үти-үти!» — тип, һоро өйрәкте үҙебеҙ менән кайтырға сакырҙы.* С. Агиш.

**ҮТКЕЛ** *и. диал.* Үткәүел.

**ҮТКЕЛЕК** *и.* Ишек төбөндәге үтеп йөрөй торған урын. *Үткелек аша залға инеү.*

**ҮТКЕН** *с. диал.* Үткер.

**ҮТКЕНСЕ** *и.* **1.** Юл ыңғайы үтеп барған кеше; уҙғынсы. *Тигеҙ ерҙә донъяның хужаһы һымак ултырған был дүрт мөһабәт ағас һәр үткенсене үҙенә кабат-кабат әйләнеп карарға мәжбүр итә.* Р. Солтангәрәев.

**2.** *с. мәғ.* Кайҙалыр үтеп, китеп барған. *Поездан төшкәс тә, .. үткенсе машинаға ултырҙым.* Д. Исламов. *Һуңғы йылдарҙа .. [Шөңгәккүлдә] үткенсе коштар ҙа туктамай башланы.* «Совет Башкортостаны», 1970, 8 ғинуар.

**ҮТКЕР** *с.* **1.** Йөҙө бик йока йәки осо, теше бик осло; якшы үтеүсән. *Үткер балта. Үткер бысак. Үткер бысҡы. Үткер теш. Үткер салғы.*

**2.** *күсм.* Кыйыу һәм сос. *Үткер бала.* ■ *Тау бөркөтөндәй үткерҙәр егеттәр.* М. Тажи.

**ҮТКЕРЛӘНЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **үткерләү.** *Үткерләнгән бысак.*

**2.** *күсм.* Кыйыуға әйләнеү, кыйыу булыу. *[Айбулат] үҙе бик күпте белә, һалдаттан шундай үткерләнеп кайткан.* Һ. Дәүләтшина. *Халык яҙмышын тәрәнерәк төшөнә һәм ижтимағи тормошка ныклабырак ылыға барған һайын Ш. Бабичтың ижады социаль яктан үткерләнә төшә.* К. Әхмәтйәнов.

● *Үлер вакыты етһә, себендең мороно үткерләнә.* Әйтем.

**ҮТКЕРЛӘТЕҮ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **үткерләү.** *Бысакты үткерләтеп алыу.*

**2.** *күсм.* Кыйыуға әйләндереү, кыйыу итеү. *Уйланыу, уйлана белеү — кешенең кешелеген күтәрә, акылын сафландыра, карашын үткерләтә торған шарт ул.* Ә. Вахитов.

**ҮТКЕРЛӘҮ** *к.* Кайрап, игәп үткергә әйләндереү; үткер итеү. *Балта үткерләү. Бысҡы үткерләү.* ■ *Ул [Айрас] кескәй генә игәү һыныгы менән тырышып-тырышып башак үткерләй.* Ш. Насыров.

**ҮТКЕРЛӘШЕҮ** *к.* **1.** *урт. ярҙамл. кар.* **үткерләү.** *Балта үткерләшеү.*

**2.** *күсм.* Кыйыу, сос булып эш итеү. *[Кунактар:] Хәҙер донъяһы шулай кырыҫка калып китте шул. Улар [йәштәр] үткерләшмәй нишләһен.* Һ. Дәүләтшина.

**ҮТКӘН** *с.* **1.** Хәҙерге мәлдән алдағы, бынан элекке; уҙған. *Үткән аҙна. Үткән йыл. Үткән кыш. Үткән уҡыу йылы.* ■ *Үткән яҙҙың матур шаян коянлы төш вакыты Айбулаттың күңелендә әле лә бөтә йылылығы менән һаклана.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *и. мәғ.* Үтеп киткән заман, йәшәлгән ғүмер, булған вакиғалар. *Хасбулат олатай, күрәһең, алыҫ үткәндәрҙе күҙ алдынан үткәреп, оҙак кына тынып торҙо.* З. Биишева. *Ул [әсә] карт инде, ауыр газап, михнәт менән тулған үткәне.* Ғ. Сәләм.

**ҮТКӘН-БАРҒАН** *с.* Үтеп, китеп барған; уҙған-барған. *Ауылдан үткән-барған бандит шайкалары Өмөтбайҙың тауыктарына тиклем талап киткәндәр.* Ғ. Дәүләтшин. // — *Ни ашап тороргоң? Урамга сыгып, үткән-баргандан хәйер һорашырһыңмы?* С. Агиш.

**ҮТКӘНДӘ** *р.* Үткән ваҡытта, күпмелер ваҡыт алда, теге саҡта. *Үткәндә ул беҙгә килгәйне.*

**ҮТКӘНДӘГЕ** *с.* Үткән ваҡыттағы, үткәндә булған. *Үткәндәге, бынан өс йыл элекке, һайлау ваҡытында, донъяһы буталып китеп, Ныязголдоң бик күп теләк һәм ниәттәре боҙолоп бөткәйне.* Һ. Дәүләтшина.

**ҮТКӘН-СҮТКӘН** *с. кар.* Үткән-һүткән. *Үткән-сүткән кеше. Үткән-сүткән халыҡ.*

**ҮТКӘН-ҺҮТКӘН** *с.* Тегеләй-былай үтеп, китеп торған. *[Билал] урамга сыккас, үткән-һүткән халыкты карарга сыккан кеше кеүек, бер аҙ туктап, карап торҙо.* А. Таһиров. *Үткән-һүткән кеше Нигмәт каҙактың каймак кеүек .. татлы кымыҙын эсеп китә торган булган.* С. Кулибай. // *Күҙҙең яуын алып, үткән-һүткәнде үҙенә тартып торган бинаның маңлайына «Кымыҙхана» тип, алтын хәрефтәр менән яҙылган.* Н. Мусин.

**ҮТКӘРГЕС** *и.* **1.** Ниҙелер үҙе аша үткәрә торған нәмә. *Газ үткәргес.*

**2.** Йылыны, тауышты, электрҙы яҡшы үткәрә торған матдә. *Ярым үткәргес.*

**ҮТКӘРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **үткәреү** 1,5—13. *Телефон үткәрелгән. Тәжрибә үткәрелгән. Ит мясорубканан үткәрелгән.*

**ҮТКӘРЕҮ** *к.* **1.** Ситкә ҡайрылып, тайпылып, юл биреү, үтергә мөмкинлек биреү. *Кешене үткәреү. Машинаны үткәреү. Өй тапкырынан үткәреү.* ■ *Беҙҙе бер тар урамга индереп, шунда теҙеп куйҙылар. Шаулашырга, ул урамдан кеше үткәрергә кушманылар.* Д. Юлтый./ Билдәле бер урынға юл алдырыу, ҡайҙалыр үтергә нрек биреү. *Өҫтәл эргәһенә үткәреү. Түргә үткәреү.* / Ҡайҙалыр урынлашырға, ниндәйҙер составҡа инергә мөмкинлек биреү. *Бюрога үткәреү. Депутатлыкка үткәреү./ һөйл.* Баҫып сығарырға, сәхнәлә ҡуйырға һ. б. рөхсәт итеү. *Әҫәрҙе цензуранан үткәреү.*

**2.** Үҙеңдән алға сығарыу; уҙҙырыу. *Йүгерешкәндә кешене үткәреү.*

**3.** Асыҡ һәм башҡа булып, ниҙер аша берәй ергә юл алдырыу; уҙғарыу. *Ишектән үткәреү. Капканан үткәреү.*

**4.** Һеңдереп, һарҡытып һ. б. үҙе аша сығарыу. *Итек һыу үткәрә. Кыйык ямгыр үткәрә. Тун елде үткәрмәй./ кусм.* Тәнгә, йәнгә тәьҫир итеү. *Һыуык үткәреү.*

**5.** Билдәле бер йүнәлештә һуҙыу, һалыу, һуҙымы булған нәмәне ҡороу, төҙөү. *Канал үткәреү. Өйгә газ үткәреү. Ер аҫтынан торба үткәреү. Телефон үткәреү.* ■ *[Камыр батыр] юлды ла ошо таштың уртаһынан үткәрергә булган, ти* (Әкиәттән).

**6.** *һөйл.* Тауыш биреү, һайлап алыу һ. б. һөҙөмтәһендә ҡабул ителеүгә, алыныуға ирешеү. *Проектты комиссиянан үткәреү.* ■ *Кем алдында гына булмаһын, [Иртуганов] һүҙен үткәрә белә.* Д. Юлтый. *Хөкөм үҙ кулыңда булгас, ни эшләһәң дә үткәреп була.* Һ. Дәүләтшина.

**7.** Берәй күңелһеҙ, ауыр хәл-ваҡиғаны, сирҙе һ. б. баштан кисереү, күреү, татыу; уҙғарыу. *Ауырлыктарҙы үткәреү.* ■ *Кыҫымдарҙы үҙ елкәләреңдә үткәреү сәбәпле бөкһөп ярлыланган халык күпселеген куҙгатып булырмы?* Ғ. Дәүләтшин. *Үҙ юлымда мин дә үткәрҙем башка үткәрмәгән бик күпте.* Ғ. Хәйри./ Иҫәпкә, ҡаралыуға, тикшереүгә дусар итеү. *Аттестация комиссияһынан үткәреү. Материалдарҙы регистрациянан үткәреү.* ■ — *Беҙҙе лә врачтан үткәрергә тырыша ул [Мурзин].* Һ. Дәүләтшина.

**8.** Күпмелер ваҡытты ҡайҙалыр йәшәү, тороу; уҙғарыу. *Байрамды күңелле үткәреү. Йәйҙе ауылда үткәреү.* ■ *[Зыя] эшһеҙ ятыуынан, көн үткәрә алмауынан зарланып та алды.* М. Тажи. *Уларҙың [ярлы каҙактарҙың] үҙ тирмәләре юк. Байҙарҙың малын көтөп, кайҙа етте, шунда көн үткәрәләр икән.* Ғ. Ғүмәр. *Ысын ирекле алгы көн өсөн көрәшеп үткәр кыҫка гүмереңде!* Ш. Бабич.

**9.** Ниндәйҙер эш, сараны һ. б. ғәмәлгә ашырыу, тормошҡа ашырып тамамлау; уҙғарыу. *Байрам үткәреү. Дәрес үткәреү. Йыйылыш үткәреү. Репетиция үткәреү. Туй үткәреү. Тәжрибә үткәреү. Һайлау үткәреү. Әҙерлек үткәреү.* ■ *Беҙ Наиләнең йәш тулыу көнөн иәй үткәрәбеҙ.* С. Агиш.

**10.** Тишеп йәки тишектән аша сығарыу. *Енте энә күҙенән үткәреү.* ■ *Яланбикә агаһының калын көпөһөнә энәһен үткәрә алмай ыҙаланып .. ултыра.* Һ. Дәүләтшина./ *кусм.* Үҙенең әҙмә-эҙлегендә хыялда һ. б. барлыҡҡа килтереү, күҙ алдына баҫтырыу; уҙғарыу. *Хасбулат олатай, күрәһең, алыҫ үткәндәрҙе күҙ алдынан үткәреп, оҙак кына тынып торҙо.* З. Биишева. *Былтыр ошо кыҙ менән нисек осрашыуымды хәтеремдән үткәреп ултырҙым.* Н. Мусин.

**11.** Тәғәйенләү, теркәү. *Приказ буйынса практикант итеп үткәргәндәр.* С. Агиш.

**12.** Һыҙыу, билдәләү. *Сик үткәреү. Тура һыҙык үткәреү. Ыҙан үткәреү.*

**13.** Берәй машина, ҡоролма ярҙамында эшкәртеү. *Итте мясорубканан үткәреү.* ■ *[Айбикә] сепараттан һөт үткәрҙе, самауыр куйҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**14.** *кусм.* Хаҡҡа биреү, һатыу. *Киммәт үткәреү. Малды тиҙ үткәреү.* ■ — *Байҙарга уҙҙәренең тауарын, малын үткәрергә ҙурырак баҙарҙар кәрәк.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Күҙҙән үткәреү** *кар.* **күҙ. Ҡылыстан үткәреү** сабып үлтереү. **Энәнән-ептән үткәреү** бик ентекләп тикшереү.

**ҮТКӘРЕШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **үткәреү** 1, 3, 5—7, 9, 12—14. *Байрам үткәрешеү. Енте энә күҙенән үткәрешеү. Телефон үткәрешеү.*

**ҮТКӘРМӘ** [1] *и. иҫк.* Доғалыҡ яҙылған бетеүҙең бауын кәүҙә аша кейеп, аяҡ осонан сығарып эшләнә торған ырым.

**ҮТКӘРМӘ** [2] *и. диал. кар.* **типке** [1].

**ҮТКӘРТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **үткәреү** 1, 3, 5—13. *Телефон үткәртеү. Ишектән үткәртеү. Тәкдимде үткәртеү. Материалды регистрациянан үткәртеү. Репетиция үткәртеү. Ыҙан үткәртеү.*

**ҮТКӘҮЕЛ** *и.* **1.** Тау, урман, һыу, һаҙҙан аша үтерлек тар ер. // *Үткәүел ер. Үткәүел урын.* ■ *[Аҡбуҙат:] Беҙҙең үткән бер ерҙән күлде бүлгеләп, үткәүел яһалыр.* «Аҡбуҙат». *Үткәүелкәйҙәрҙе ай үтәйек, үтә алған ерҙән китәйек* (Халыҡ йырынан).

**2.** *диал.* Аша үтеп йөрөрлөк ваҡ ағаслыҡ. *Үткәүелдәр кисә генә түгелдәр ине былай, төпһәләре генә ҡалған.* М. Уразаев.

**ҮТКӘШЕҮ** *ҡ.* Оҙаҡ ваҡыт ас йөрөүҙән ныҡ тартылыу (эскә ҡарата). *Аслыҡтан бүренең эсе үткәшкән, күҙҙәре төпкә батҡан.* З. Биишева.

**ҮТКӘШТЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Оҙаҡ ваҡыт ас йөрөп, ныҡ тартылдырыу (эсте). *Эсте үткәштереү.*

**2.** Ике ҡул бармаҡтарын бер-береһенең араһына үткәреү. *Михаил Иванович бармаҡтарын үткәштереп, ҡулын түбыгына һалды.* С. Кулибай.

**ҮТЛӘМ: үтләм таяҡ** *диал.* тыйғыса.

**ҮТЛӘТЕҮ** *ҡ.* Майлы нәмәне күп ашағандан һуң тәмһеҙ итеп кикертеү. *Күп ашаһаң, үтләтә.*

**ҮТЛӘҮ** *ҡ.* Майлы нәмәне күп ашағандан һуң тәмһеҙ итеп кикереү. *[Көнһылыу:] Бына әйт әле, һин зоотехник бит, беҙ үҙебеҙ майлы аштан үтләйбеҙ. Ә мал? Шуны уйлағаныгыҙ бармы?* Ғ. Ибраһимов.

**ҮТЛӘШ** *и. диал.* **1.** Тыйғыса.

**2.** Күтәреү таҡтаһы.

**3.** Иреш ебе.

**ҮТМӘҪ** *с.* **1.** Үткер булмаған, киҫмәгән, тупаҡ. *Үтмәҫ бысаҡ. Салғының үтмәҫ яғы.*

**2.** Һатыуҙа еңел үтмәүсән, тиҙ һатылмаусан, һоралмай торған. *Үтмәҫ мал.* **Үтмәҫ тауар** *кар.* **тауар.**

♦ **Үтмәҫ игәү** *кар.* **игәү** [3].

● *Үтмәҫ бысаҡ ҡул киҫер.* Мәҡәл.

**ҮТМӘҪЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Үтмәҫ (1 мәғ) итеү, үтмәҫкә әйләндереү.

**ҮТМӘҪЛӘНЕҮ** *ҡ.* Үткерҙән үтмәҫкә әйләнеү, үтмәҫ булыу. *Көрәк үтмәҫләнгән.*

**ҮТМӘҪЛӘҮ** *ҡ.* Үткерҙән үтмәҫкә әйләндереү, үтмәҫ итеү. *Бысаҡты үтмәҫләү.* ■ *[Кәмән менән Сәмән — Сәлмәнгә:] Быҫҡы менән балтаны эштән сығарып, үтмәҫләп бөтөргәнһең!* (Әкиәттән).

**ҮТӘ** *р.* **1.** Бер яғынан икенсе яғына сыҡҡансы; ашанан-аша. *Үтә ағып төшөү. Үтә күренеү. Үтә тишеү.* ■ *Яңғыҙ йорттоң ни, ел ҡайһы яҡтан килһә лә, үтә һуға.* Р. Солтангәрәев.— *Ярлылар хәҙер һеҙҙең ысын йөҙөгөҙҙө күрҙе. Эсегеҙҙе лә үтә белеп торалар.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Сиктән тыш, бик, ифрат. *Үтә матур. Үтә яҡшы.* ■ *— Туҡта, Ямал, үтә шаштырып ебәрҙең түгелме?* М. Тажи.— *Ел-дауыл ҡуҙғалып китмәгәйе. Үтә ныҡ ҡыҙҙыра бит, балам!* З. Биишева.

**3.** *бәйл. функцияһында* Төп килештәге һүҙҙәрҙән һуң килеп, ниҙеңдер бер яғынан икенсе яғына табан булған йүнәлеште белдерә; аша. *Ишек үтә инеү. Урман үтә сығыу.* ■ *Урман үтә үткән был оскалаҡ юл ағас тамырҙары менән киртмәсләнеп, үгеүселәрҙе үрле-түбәнле һиңкетеп, маҙаһын ала.* Т. Хәйбуллин. *Беҙ вагон тәҙрәһе үтә алыҫтарға ҡарайбыҙ.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Үтә иҫәр буйға үҫәр.* Әйтем. *Үтә ҡыҙыл тиҙ уңыр.* Мәҡәл.

**ҮТӘБИКӘ** *и.* Ҡанат осо ҡара, үҙе сағыу һары төҫтәге һыҙғырып һайрай торған урман ҡошо; һарығош. *Үтәбикә ҡошо ашыҡмай ғына һыҙғыра.* Я. Хамматов.

**ҮТӘГҮР** *с. диал.* Күрәш. *Үтәгүр кеше.*

**ҮТӘҘЕК** *с.* Үтә күренмәле. *Үтәҙек болот. Үтәҙек томан.*

**ҮТӘЛЕҮ** *ҡ.* Бойомға ашыу; ғәмәлләшеү. *Бойороҡ үтәлә. Йөкләмә үтәлә. План үтәлә.* ■ *Эткол байҙың бойороғо бөтәһенә лә закон, ул үтәлмәй ҡалмай.* Т. Хәйбуллин. *Геройҙарым, инде һеҙ тыныстыр, көткән теләгегеҙ үтәлде.* Ғ. Сәләм.

**ҮТӘЛЕШ** *и.* Берәй эштең тормошҡа атҡарылышы, ғәмәлләнеше. *Пландың үтәлеше. Ҡарарҙың үтәлеше.*

**ҮТӘЛӘЙ** *р.* Үтәнән-үтәгә, үтә. *Үтәләй тишеү. Үтәләй күренеү.* ■ *[Әмирхановтың] күҙҙәре бик үткер, тирә-яҡтағы бөтә нәмәне үтәләй тишеп ҡарай.* С. Агиш.

**ҮТӘЛӘК** *и.* Тишекле сүмес.

**ҮТӘНӘН-ҮТӘ** *р.* Бер яғынан икенсе яғына сыҡҡансы; үтә. *Үтәнән-үтә күренеү. Үтәнән-үтә тишеү.* ■ *Яланда һырғаҡ ел тәнде үтәнән-үтә һуҡты.* М. Тажи.

**ҮТӘНӘН-ҮТӘГӘ** *р. кар.* **үтәнән-үтә.**

**ҮТӘРЕМ** *и. диал.* Түтәрәм.

**ҮТӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. кар.* **үтәү.** *Бойороҡто үтәтеү. Планды үтәтеү. Эште үтәтеү.*

**ҮТӘҮ** *ҡ.* Ғәмәлгә ашырыу. *Вәғәҙәне үтәү. Йомошто үтәү. Ҡушҡанды үтәү.* ■ *— Иптәш командир, һеҙ ҡушҡан задание тулыһы менән үтәлде,— тине ул [Асағай].* Һ. Дәүләтшина. *Кабинеттан кешеләр, йомоштарын үтәп, сығып бөткәс, Сыртланов .. йомшаҡ креслоһына кирелеп ултырҙы.* С. Агиш. *Кем хеҙмәтен намыҫ менән үтәй, ҡайҙа эшләмәһен, хүр түгел.* Ғ. Сәләм.

**ҮТӘҺЕНӘН** *р.* Ниҙеңдер араһынан үтә. *Теш үтәһенән төкөрөү. Урман үтәһенән ҡайтыу.* ■ *[Мәзһәр] кеше аҙыраҡ йөрөй торған ерҙән, баҡса үтәһенән атланы.* Ш. Насыров. *Күк бушлығындағы ай ҙа шекәрә болоттарҙың үтәһенән уның [Сәғиҙәнең] күҙҙәренә текләп, йылмайғандай булды.* М. Тажи.

**ҮШӘН** *с. диал.* **1.** *кар.* **сабан** 1. *Үшән ат.* / Әрләгәндә әйтелә. *[Хәйҙәр] етеҙ генә һикереп төштө лә: — Үшән, ҡуҙғала алмай тора! — тип, атты әрләгән булып, арҡанды ыскындырҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Мыштыр.

# Ф

**Ф** [эф] Башҡорт алфавитының егерме туғыҙынсы хәрефе.

**ФА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* «До»нан башланған музыкаль гамманың дүртенсе тауышы һәм шул тауышты белдергән нота.

**ФАБРИКА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Машиналар системаһы ҡулланыуға нигеҙләнгән еңел промышленность предприятиеһы. *Ҡағыҙ фабрикаһы. Шырпы фабрикаһы. Фабрикала эшләү.*

**ФАБРИКА́НТ** [*рус.*] *и.* Капиталист — фабрика хужаһы. *Ул хәйерселәр .. һуғыш арҡаһында байлыҡ йыйып ҡалған фабриканттарға тамаҡ туйҙырыу өсөн көстәрен һаталар.* Д. Юлтый.

**ФАБРИКА́Т** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Фабрикала эшләп сығарылған, етештерелгән әҙер нәмә. *Ҡағыҙ фабрикаты. Туҡыма фабрикаты.* **Ярым фабрикат** яртылаш эшкәртелгән нәмә.

**ФА́БУЛА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. әҙ.* Әҙәби әҫәрҙә һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың сюжет схемаһы.

**ФАВОРИ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. кит.* **1.** Юғары дәрәжәләге кешенең үҙе яратҡан, ныҡ яҡлаған кешеһе. *Батшаның фавориты.* / *Юғары ҡатлам ҡатын-ҡыҙының һөйәре. Фаворит булыу.*

**2.** Бәйгеләрҙә: еңеүенә күпселек кеше ышаныс тотҡан ат.

**ФАГО́Т** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Симфоник оркестр составына ингән түбән тембрлы тынлы ағас музыка ҡоралы. *Фаготта уйнау.*

**ФАГОТСЫ** *и.* Фаготта уйнаған кеше.

**ФАГОЦИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. биол.* Тереклектең сит есемдә һәм бактерияларҙы йотоу һәләтенә эйә булған күҙәнәге.

**ФАЖИҒӘ** [*ғәр.*] *и.* Бик ҙур ҡайғы, бәлә килтергән ауыр хәл-ваҡиға. *Һуғыш фажиғәһе.* ■ *Быйыл яҙ атаһының автомобиль катастрофаһында һәләк булыу фажиғәһен Айсыуаҡ бик ауыр кисерҙе.* Ш. Янбаев.

**ФАЖИҒӘЛЕ** *с.* Фажиғә нигеҙендә килеп сыҡҡан. *Риүәйәттәрҙә Ҡаһым түрәнең фажиғәле үлеме тураһында ла мәғлүмәттәр бар.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 4 февраль. /Фажиғә менән бәйләнешле. *Фажиғәле тормош. Фажиғәле яҙмыш.*

**ФА́ЗА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Берәй процестың, күренештең үҫеш һәм үҙгәреш барышындағы айырым бер осор йәки мәл. *Үҫештең һуңғы фазаһы.* / *биол.* Организмдың индивидуаль үҫешендәге бер этап. *Бойҙайҙың һөтләнеү фазаһы. Балауыҙланыу фазаһы.*

**2.** Ниҙеңдер үҙгәрешен характерлай торған билдәле бер хәле.

**3.** *физ., хим.* Ҡатнаш элементлы системаның бер генә төрҙән торған өлөшө. *Шыйыҡ фаза. Ҡаты фаза.*

**4.** *геол.* Тау тоҡомдарының ниндәйҙер бер сифаты тура килгән иң ҡыҫҡа ваҡыт берәмеге. *Минераллашыу фазаһы.*

**5.** *эл.* Генератор обмоткаһының айырым төркөмө һәм шуға тоташтырылған сым.

**ФАЗАЛЫ** *с.* Фазаға (1, 5 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Фазалы индикатор. Фазалы үҙгәрештәр. Өс фазалы электр двигателе.*

**ФАЗА́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кар.* **ҡырғауыл.**

**ФАЗИЛИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Өҫтөнлөк. *Башҡорттар батша заманында гөрөф-ғәҙәттәрен, тарихта булған фазилиәттәрен, иҫке матур йырҙарын юғалтып баралар ине.* М. Ғафури.

**ФА́ЗИС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кар.* **фаза** 1.

**ФАЗЛӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Артып ҡалған нәмә; ҡалдыҡ. *Бынан һуң рәис хәҙрәттәре мәжлескә фазлә бирә.* М. Ғафури.

**ФАЗЫЛ** [1] [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Оло хөрмәткә эйә. *Мулла имәс бағым-бағым ил алдаһа, фазылды хаҡаратлап яманлаһа.* Аҡмулла.

**2.** Белемгә эйә; белемле. *Кем наҙан шул нәмәнең асылын белмәй, бер уға фазыл, наҙан — унда айырма тапмай ул.* М. Ғафури.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ФАЗЫЛ** [2] [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Яҡшылыҡ, изгелек. *Эй Фазыл Туйкин, хоҙайҙың фазылы менән туй яһа.* Ш. Бабич.

**ФАИ́Ҡ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Өҫтөн, юғары. *Фаиҡ булыу.* ■ *Ҙурҙарҙы маҡтар өсөн беҙ тиң түгел, ҡанса шиғыр әйтһәк тә унан фаиҡ.* М. Ғафури.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ФАЙДЕШИ́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Затлы ебәк тауар. *Файдешиндан тегелгән кофта.* // *Файдешин күлдәк. Файдешин яулыҡ.*

**ФАЙҘА** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кем йәки нимә өсөндөр кәрәкле һөҙөмтә, яҡшы нәтижә, яҡшылыҡ. *Файҙаһы тейеү. Үҙ файҙаңды ҡарау.* ■ *Һеҙ Килдебай ҡустының күп хеҙмәттәрен белмәйһегеҙ әле. Егерменсе йылдарҙа ла, аслыҡ йылдарында ла беҙгә күп файҙаһы тейгән кеше.* Ғ. Дәүләтшин. *[Әбей:] Бында һерәйеп ултырған сыуалды һаҡлап ятыуҙан файҙа сыҡмаҫ, улым* (Әкиәттән). *Агиҙелкәйҙәрҙең ай һауаһы йәнгә рәхәт, тәнгә ҙур файҙа* (Халыҡ йырынан). / Кемдер файҙаланырға, тотонорға тейеш булған өлөш; матди байлыҡ. *Йәтимдәр файҙаһына аҡса йыйыу.* ■ *Һәр ауылдың .. төрлө кәрәк-яраҡҡа халыҡ файҙаһына тотолорға тейеш булған иген мәгәзәйе бар.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Алыш-биреш тән йәки берәй эштән килгән сығымдан ҡалған өҫтәмә мал; төшөм. *Файҙа алыу. Файҙа килтереү. Файҙа күреү. Һатыуҙан килгән файҙа.* ■ *Алыҫ ерҙән күпис килә бер аҡсаны файҙа тип* (Бәйеттән). **Файҙаһы файҙа, ҡара һыйыр ҡайҙа?** табыш алыу маҡсатында эшләнгән эш файҙаһыҙ булғанда әйтелә.

□ **Файҙа итеү** 1) яҡшы һөҙөмтә биреү, ярҙам итеү. *[Тәнзилә] Сабыр ит, балаҡай, илау .. файҙа итмәҫ.* М. Тажи; 2) өҫтәмә аҡса, мал алыу. *Алыш-биреш менән файҙа итеү.*

**ФАЙҘАЛАНЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **файҙаланыу.** *Башҡортостан тәбиғи көтөүлектәргә бай. Ләкин .. улар планһыҙ, нисек тура килде шулай файҙаланыла.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 28 апрель.

**ФАЙҘАЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Эштә йәки тормошта берәй кәрәк өсөн тотоноу; ҡулланыу. *Атом энергияһын хужалыҡта файҙаланыу. Машинаны йөк ташыуға файҙаланыу.* ■ *[Сәғиҙә:] Мин был диаграммаларҙы .. дәрестә күргәҙмә материалдар итеп файҙаланам.* М. Тажи. / Кем йәки нимәгәлер нигеҙләнеп эш итеү, нимәнелер билдәле бер сара итеп ҡулланыу. *Ваҡытты файҙаланыу. Законды файҙаланыу. Мөмкинлекте файҙаланыу.* ■ *[Ныязғол:] Закон ни ул беҙҙең өсөн ҡоролған. Уны файҙалана белергә генә кәрәк.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Сығанаҡ килешендәге һүҙҙәрҙән һуң килеп, берәй эш-хәл күренеште үҙ ихтыяжынан сығып, үҙ файҙаһы өсөн ҡулланғанды белдергән һүҙбәйләнеш яһай. *Кеше ярҙамынан файҙаланыу. Биш минуттан файҙаланыу. Шау-шыуҙан файҙаланыу.* ■ *Ғәләү был ваҡиғанан файҙаланып, итте бик ныҡ һуғып ҡалырға уйланы.* Т. Йәнәби.

**ФАЙҘАЛЫ** *с.* **1.** Яҡшы, кәрәкле һеҙемтә бирерлек, файҙаһы булған. *Файҙалы аҙыҡ. Файҙалы дарыу. Файҙалы эш. Файҙалы һүҙ. Файҙалы булыу.* ■ *Һин илеңә файҙалы кеше бул, туғаным.* Ғ. Сәләм. *Алда рәхәт ҡәҙерен белмәккә михнәт файҙалы.* Ш. Бабич.

**2.** Өҫтәмә мал, аҡса килтергән. *Файҙалы һөнәр. Файҙалы сауҙа.*

**ФАЙҘАҺЫҘ** *с.* **1.** Файҙаһы булмаған, файҙа бирмәгән. *Файҙаһыҙ нәмә. Файҙаһыҙ эш.* ■ *Тик кенә йөрөп ашау, унан һуң маҙырап йоҡлау, ҡарт булһа ла, Аралбайға ла файҙаһыҙ булманы.* Ғ. Дәүләтшин. *Әлдә һин бар, юҡһа донъям мәғәнәһеҙ һәм файҙаһыҙ.* Ш. Бабич.

**2.** Өҫтәмә мал, аҡса килтермәгән. *Көтөү эше бик йыбаныс, файҙаһыҙ бер һөнәр ул.* Һ. Дәүләтшина.

**ФАЙҘАҺЫҘҒА** *р.* Кәрәкмәгәнгә, бушҡа. *Имеш, мәрхүм янмаҫ ерҙә янды файҙаһыҙға, бахыр, өшөнө.* М. Кәрим.

**ФА́КЕЛ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Таяҡ башына ыҫмалалы сүбәк урап яндырып йөрөтөлә торған ут; сыраҡ. *Факел яндырыу.* ■ *Бына юл буйында бер-бер артлы ике факел күренде.* Ә. Бикчәнтәев.

**2.** Конус рәүешендәге ялҡын, шулай уҡ шыйыҡлыҡ һәм газдың шул рәүештәге ағымы. *Төн ҡараңғы. Яңы асылған скважиналар янында факел булып газ яна.* К. Мәргән. *Беҙҙә газдың байтаҡ өлөшө факелдарҙа яндырыла.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 22 февраль.

**ФАКСИ́МИЛЕ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Яҙған яҙыуҙың фото ярҙамында нәҡ үҙе һымаҡ итеп ҡағыҙға төшөргән күсермәһе.

**ФАКТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ысын булған хәл-ваҡиға йәки күренеш. *Тарихи факт./* Ваҡиға, осраҡ. *[Сынбулатов:] Беҙҙә иген эрәм-шәрәм итеү факты юҡ.* М. Тажи./ Фекер, һығымта йәки фаразға нигеҙ, таяныс булған нәмә; дәлил. *Фактар килтереү. Фактар менән бәйләү.* ■ *Тимер .. шул уҡ дөрөҫлөктө халыҡтың үҙ теле менән, үҙенә таныш фактар менән һөйләүен дауам итте.* Б. Бикбай.

**2.** *киҫ. мәғ.* Әйтелгән фекерҙе дөрөҫләй; ысын, дөрөҫ. *[Никитин:] Юлия, әйткәнде тыңла, һине «ҡара исемлеккә» кертеүҙәре тураһында асыҡ мәғлүмәтебеҙ бар. Был факт.* Һ. Дәүләтшина.

**ФАКТИК** *с.* Фактҡа нигеҙле; ысын. *Фактик хәл. Фактик материал.*

**ФА́КТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Берәй эш-хәлдең, күренештең үҙенсәлеген билдәләгән этәргес көс, сәбәп. *Тарихи фактор.* ■ *[Туғанов:] Көнөндә сәсеү урожайҙың яҙмышын хәл итә торған мөһим факторҙарҙың береһе.* Ә. Вәли.

**ФАКТО́РИЯ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* **1.** Алыҫтағы промысла райондарында урынлашҡан сауҙа-тәьминәт пункты.

**2.** Колониаль илдәрҙә: сит ил сауҙагәрҙәренең сауҙа контораһы һәм улар торған урын.

**ФАКТУ́РА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. махс.* **1.** Сәнғәт әҫәрҙәрендә художество техникаһының үҙенсәлеге. *Шиғыр фактураһы. Ҡобайыр фактураһы.*

**2.** Туҡыма, быяла һ. б. шуның кеүек нәмәләрҙең тышҡы күренешендәге, төҙөлөшөндәге үҙенсәлек. *Фактураһы һырлы туҡыма.*

**3.** Һатып алыусыға бирелгән тауарҙың исеме, хаҡы төрө яҙылған рәсми ҡағыҙ. *[Һатыусы:] Тауар бар ҙа ул, тик фактуралар килмәгән. Һатырға сығара алмай торабыҙ.* Б. Бикбай.

**ФАКУЛЬТАТИВ** [*рус.* факультативный ⟨ *фр.*] *с.* Мәжбүри булмаған, теләк буйынса һайланған. *Факультатив курс. Факультатив дәрес.*

**ФАКУЛЬТЕ́Т** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Юғары уҡыу йортонда ниндәйҙер бер өлкәгә бәйле фәндәрҙе өйрәткән административ вазифалы бүлек. *Математика факультеты. Ветеринария факультеты. Факультет йыйылышы.* ■ *Мәскәү университетының филология факультетында лекциялар тыңлап йөрөгәндән һуң, Ф. Д. Нефедов бөтөнләйе менән яҙыусылыҡ эшенә бирелә.* С. Галин.

**ФАЛ** [1] [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Буласаҡ хәлде, алдағы яҙмышты алдан белеүгә ҡоролған ырым; күрәҙәлек. *[Мәрфуға:] Әллә ҡарт һалдырып, фал менән ырым һатып ҡарайыммы икән. Анау Фатиха ҡоҙағый энәһенән ебенә тиклем дөрөҫтө әйтә лә ҡуя.* С. Кулибай. **Фал асыу** фал китабына ҡарап киләсәкте йәки үткәнде әйтеү. **Фал китабы** күрәҙәлек өсөн төҙөлгән махсус китап.

**2.** Матур яҙмыш, бәхет.

◆ **Фал һалыу** ноҡот, ҡарт кеүек нәмә менән күрәҙәлек итеү.

● *Фал биргән малға ышанма.* Мәҡәл.

**ФАЛ** [2] [*рус.* ⟨ *голл.*] *и. диңг.* Елкәндәрҙе, флаг һәм сигнал тамғаларын күтәреү, төшөрөү өсөн хеҙмәт иткән махсус бау./ *авиа.* Парашютты кеше ҡатнашлығынан башҡа асыу өсөн бер осо самолётҡа икенсеһе парашют ҡуласаһына беркетелгән бау.

**ФАЛА́НГА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Боронғо гректарҙа: йәйәүле ғәскәрҙең бер нисә шеренга булып яуға теҙелгән тығыҙ сафы.

**2.** *ҡар.* **ҡарағорт.**

**ФАЛИЖ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ниндәй ҙә булһа бер ағзаның эшмәкәрлек һәләтен юҡҡа сығарған ауырыу; паралич. *Фалиж һуғыу.*

**ФАЛНАМӘ** [*ғәр.* + *фарс.*] *и. иҫк.* Фал китабы (*ҡар.* **фал** [1] 1). *Фалнамә асыу.*

**ФАЛСЫ** *и. иҫк.* Фал [1] (1 мәғ.) һалыусы; күрәҙәсе. *Инде капланды өмөт, үлде, юғалды фалсыһы.* Я. Юмаев.

**ФАЛЬСИФИКА́ТОР** [*рус.*] *и.* Дөрөҫлөктө боҙған, боҙоп күрһәткән кеше; ялғансы. *Тарих фальсификаторҙары. Буржуаз фальсификаторҙар.*

**ФАЛЬСИФИКАТОРЛЫҠ** *и.* Фальсификаторға хас эш. *Фальсификаторлыҡ менән шөғөлләнеү. Фальсификаторлыҡҡа юл ҡуймау.*

**ФАЛЬСИФИКА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Дөрөҫлөктөң боҙоп, ялғанлап күрһәтелеүе. *Фальсификация яһау.*

**ФАЛЬЦЕ́Т** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Ирҙәрҙәге иң юғары, бик нәҙек тауыш. *Фальцет менән йырлау.*

**ФАМИ́ЛИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Кешенең атанан балаға күсеп, үҙ исеменә ҡушып йөрөтөлә торған ғаилә атамаһы. *Ир фамилияһына күсеү. Фамилияны алмаштырыу.* ■ *Бына шулай, беҙ бер мәктәптә ике Сәлих икебеҙҙең дә фамилиябыҙ Мәхмүтов.* С. Агиш. *Мәғлүм булыуынса, әүәл башҡорттарҙа хәҙерге кеүек тотороҡло фамилия булмаған. Рәсми документтарҙа атаһы-*

*ның исеме гәҙәттә улының фамилияһы итеп алынған.* И. Аҡманов.

**ФАМИЛИЯЛАШ** *с.* Бер үк фамилиялы. *Фамилиялаш кешеләр.*

**ФАНАТИЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] **1.** Үҙе табынған дингә мөкиббән бирелеүҙән һәм башҡа динде бөтөнләй инҡар итеүҙән килгән, фанатикка хас булған фекер йөрөтөү рәүеше. *[Кулбаш волосындағы] халыҡты ҡара төн һымаҡ дини фанатизм, иҫке гөрөф-гәҙәттәр, вәхшилек, ҡоллоҡ баҫып алған.* А. Карнай.

**2.** Берәй эшкә, идеяға бик ныҡ бирелгәнлек.

**ФАНАТИК** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Үҙ диненә мөкиббән бирелгән, башҡа дин кешеләрен йәнетәне менән күрә алмаған кеше. *Дин менән ағыуланған фанатиктар өйөрө йәш уҡытыусыны әләктереп алды.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** Ниндәйҙер бер эшкә, идеяға бик ныҡ бирелгән кеше.

**ФАНАТИК** [*рус.* фанатический] *с.* Үҙ диненә мөкиббән бирелгән, башҡа диндәге кешеләрҙе күрә алмаған; фанатизмға бирелгән. *Фанатик ауыл руханиҙары яңылыҡ яҡлы кешеләрҙе: «Һин дәһри!» — тип һүккән.* С. Ҡудаш.

**ФАНЁР** [*рус.* фанера ⟨ *нем.*] *и.* Ҡатлы-ҡатлы итеп яһалған киң йоҡа таҡта; кибәҙә. *Күп ҡатлы фанер. Фанер менән көпләү. // Фанер ҡумта.*

**ФАНЗА** [*рус.* ⟨ *кит.*] *и.* Корея менән Ҡытайҙағы торлаҡ (ғәҙәттә ауыл өйөнә ҡарата әйтелә). *Фанза эсе киң һәм буш ине. Карауат, диван кеүек нәмәләр юҡ.* Б. Дим.

**ФАНИ** [*ғәр.*] *с.* Үтеп, юҡҡа сығасаҡ; ваҡытлы. *[Батырша:] Мәңгелек бер ни юҡ, бөтәһе тик фани.* Р. Ғарипов. *Фани донъяларҙы бер уйлаһаң, башҡынайың булыр диуана* (Халыҡ йырынан).

**ФАНТ** *и. ҡар.* **фантик** [1].

**ФАНТАЗЁР** [*рус.*] *и.* Хыялға бирелгән, хыял менән мауығып йәшәгән кеше.

**ФАНТАЗИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Нимәнелер уйлап сығарыу, күҙ алдына килтерә алыу һәләте; ижади хыял. *Халыҡтың фантазияһы, тапҡыр аҡылы һәм тормош тураһындағы философияһы ҡобайырҙарҙа тәрәнерәк бирелгән.* Ә. Харисов. *Ҡарт, һунарсылар кеүек, фантазияға бай, арттырып ебәрергә ярата.* Ф. Лоҡманов.

**2.** *муз.* Ирекле рәүештә яҙылған музыкаль әҫәр. *Фантазия уйнау.* ■ *Квинтет башҡарыуында Заһир Исмәғилевтың «Шайморатов — генерал» «Кусимов», «Котелогым» көйҙәре темаһына яҙылған музыкаль фантазия тантаналы һәм дәртле яңғырай.* «Совет Башҡортостаны», 1983 13 сентябрь.

**ФАНТАСТ** [*рус.*] *и.* Фантастик (1 мәғ.) әҫтәлекле әҫәрҙәр яҙыусы.

**ФАНТАСТИК** *с.* **1.** Фантастика (1 мәғ.) менән һуғарылған, фантастикаға нигеҙләнгән. *Фантастик роман.* ■ *Азамат .. Аҡназар ҡарттың хикәйәһен, бик ҡыҙыҡлы фантастик әкиәт тыңлаған кеүек, бөтә нәмәне онотоп, иҫе китеп тыңлап ултыра.* Ҡ. Даян.

**2.** Ғәжәпкә ҡалдырырлыҡ, иҫ китмәле. *Фантастик күренеш.*

**3.** Тормошҡа ашмаҫлыҡ, хыяли. *Фантастик хыялдар.*

**ФАНТАСТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Хыял тыуҙырған эш-хәл, образ, күренештәр; ҡабартылып тасуирланған ысынбарлыҡ, тормош хәлдәре. *Тылсымлы әкиәт ни тиклем генә фантастика менән һуғарылмаһын.., ул төпһөҙ, нигеҙһеҙ уйҙырма түгел.* Ә. Харисов./ *йыйн.* Хыялға ҡоролған әҙәби әҫәр. *Фәнни фантастика.*

**2.** Тормошҡа ашмаҫлыҡ, хыяли нәмә.

**ФАНТИК** [1] [*рус.*] *и.* **1.** Уйын исеме (теҙелеп ултыралар; уйын алып барыусы уйнаусыларҙан берәр нәмә йыйып ала; кеше үҙ нәмәһен бер һөнәр башҡарып ҡайтарып алырға тейеш). *Фантик уйнау.*

**2.** Шул уйында ҡатнашыу өсөн бирелгән нәмә. *Фантик биреү. Фантик йыйыу.* ■ *Быға ниндәй наказ? — Декламация һөйләргә. Урталағы кеше минең уҫҡа ғына һыйырлыҡ һәм ике башы ла осланған ҡәләмде сығарҙы. Арала иң ярлы фантик ине.* С. Агиш.

**ФАНТИК** [2] [*рус.*] *и. һөйл.* Төрлө төҫтәге кәнфит ҡағыҙы.

**ФАНФАРА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Оҙон борғо рәүешендәге тынлы музыка ҡоралы. *Фанфара уйнау.*

**2.** *муз.* Шул ҡоралда башҡарылған сигнал йәки тантаналы музыкаль фраза. *Фестивалдең асылыуын белдереп, фанфаралар яңғырай.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 28 август.

**ФАНФАРАСЫ** *и.* Фанфара уйнаусы.

**ФАРА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Автомобиль, трактор һ. б. машиналарҙың алдындағы рефлекторлы фонарь. *Фараны яҡтыртыу. Фараны һүндереү.* ■ *Тракторҙың көслө фараһы ҡараңғылыҡты киҫеп, барасаҡ юлды яҡтырта.* Я. Хамматов.

**ФАРАЗ** [*ғәр.*] *и.* Самаға, күҙәмәгә ҡоролған фекер; гипотеза. *«Башҡорт атамаһы хаҡында, уның мәғәнә айышы тураһында фәндә үткән быуаттарҙан бире төрлө ҡараштар, төрлө фараздар йәшәп килә.* Ғ. Хөсәйенов.

□ **Фараз итеү** ныҡлы дәлилһеҙ үҙ алдыңа уйлау. *Ул [Вәли] үҙенән ҙур булған мәшһүр байҙарҙы сикһеҙ аҡыллы кешеләр тип фараз иткән кеүек, ярлы кешеләрҙе үҙенән түбән, аҡылһыҙҙар тип уйлай ине.* М. Ғафури.

**ФАРАЗАН** [*ғәр.*] *инш.* Фараз рәүешендәге фекер йөрөтөүҙе белдерә, уйлап ҡарайыҡ, әйтәйек, мәҫәлән. *[Дамир — Әһлиәгә:] Һеҙ нисек уйлайһығыҙ? Фаразан, икәүләп тормош ҡороп ебәрһәк?..* С. Кулибай.

**ФАРАИЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Үлгән кешенән ҡалған малды бүлешеү тураһындағы закондар йыйынтығы. *Мирсәйет .. ахыр ғүмерендә Сажауен тигән көйҙә фараиз мәтненә шәрех яҙҙы.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ФАРАСАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Һыбай йөрөү оҫталығы. *Шул ваҡыт Ҡарағөлөмбәт килеп ингән, туптың эсен уртанан телеп ингән, һис берәү әйтмәһә лә хан хәбәрен, фарасат гилеме менән белеп ингән.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ФАРВАТЕР** [*рус.* ⟨ *голл.*] *и.* Һыуҙың карап үтерлек тәрән ере. *Йылға фарватеры.* ■ *Ҡатмарлы фарватер буйлап теплоходты Яңы Зеландия портының капитаны оҙатып барған.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 19 февраль.

**ФАРИНГЙТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Йотҡолоҡтағы лайлалы тиресә шешеүе.

**ФАРИНГОСКОПИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Йотҡолоҡто тикшереү методы.

**ФАРМАКОЛОГ** [*рус.*] *и.* Фармакология буйынса белгес.

**ФАРМАКОЛОГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Дарыуҙарҙың организмға тәьҫирен тикшерә торған фән.

**ФАРМАН** [*фарс.*] *и.* **1.** Ҡулында власть булған кеше тарафынан бирелгән күрһәтмә; указ. *Фарман сығарыу.* ■ *Батша хәҙрәттәре үҙенең бөтә ҡул аҫтындағы халыҡтарын кафыр дошман яуынан ватанды һаҡларға саҡырып, фарман ебәргән* (Әкиәттән). *Салауаттың яҙған фарманы дошман йөрәгенә ҡуҙ һалды* (Халыҡ йырынан).

**2.** *һөйл.* Бойороҡ. *Ҡаһым түрә фарман биргән саҡта, һул ҡулында булыр ҡурайы* (Халыҡ йырынан).

**3.** *ҡусм.* Көс, ҡеүәт. *Ат фарманына сабыу.* // *Ул [Тимерғәле ағай] үҙе һүҙгә бик һаран, ә эшкә фарман кеше.* Ә. Зәйнуллин.

● *Байҙың эше фарман менән, ярлының эше дарман менән.* Мәҡәл.

**ФАРМАЦЕВТ** [*рус.*] *и.* Фармацевтика буйынса белгес. *Фармацевт булыу.*

**ФАРМАЦЕВТИКА** [*рус.* ⟨ гр.] *и.* Дарыуҙарҙы тикшереү, әҙерләү стандартлаштырыу, һаҡлау һәм файҙаланыу тураһындағы ғилми-практик фәндәр комплексы.

**ФАРРАШ** [*ғәр.*] *и. кар.* **фәрраш.**

**ФАРС** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* 19—20 быуаттағы театрҙа күберәк кеше көлдөрөүгә ҡоролған еңел эстәлекле комедия-водевиль.

**ФАРСЫ** *и.* Ирандың [Персияның] төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе. *Фарсы халҡы. Фарсы кешеһе. Фарсы теле.*

**ФАРТ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. һөйл.* Бәхет, уңыш. *Фарт килеү. Фарт итеү.*

● *Фарты юҡтың даны юҡ.* Мәҡәл.

**ФАРТЛЫ** *с. һөйл.* Бәхетле, ҡотло. *Фартлы кеше. Фартлы эш.*

**ФАРФОР** [*рус.* ⟨ *төрөк* ⟨ *фарс.*] *и.* **1.** Иң йомшаҡ аҡ балсыҡҡа төрлө кәрәк нәмә ҡушып яһалған иҙмә (төрлө нәмәләр яһау өсөн ҡулланыла). *Ҡытай фарфорынан эшләнгән сынаяҡ.*

**2.** *йыйн.* Шул иҙмәне төрлөсә эшкәртеү юлы менән яһалған һауыт-һаба. *Биҙәкле фарфор. Буталлы фарфор. Фарфор коллекцияһы.*

**ФАРШ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Тапалған, ваҡланған ит. *Фарш әҙерләү.*

**2.** Нимәнеңдер эсенә һалыу өсөн иҙеп ваҡланған, төйөлгән аҙыҡ. *Балыҡ фаршы. Бәшмәк фаршы.*

**ФАРШЛАУ** *ҡ.* Йәшелсә йәки балыҡ һ. б. эсенә фарш (2 мәғ.) тултырыу. *Борос фаршлау. Балыҡ фаршлау.*

**ФАРЫЗ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Үтәлергә тейешле эш; бурыс. *Фарыз һанау. Фарыз итеп ҡуйыу.* // *Фарыз эш.* ■ *Бөтә көс менән тырышыу беҙҙең бурысыбыҙ, өҫтөбөҙгә төшкән фарыздыр.* Ш. Хоҙайбирҙин. *Кешегә изгелек итеүҙе, яҡшылыҡ эшләүҙе Зөләйхә инәй һәр кешегә фарыз булған ғәҙәттәге хәл тип ҡарай.* Х. Шәрипов.

**2.** *дини* Дин тарафынан мәжбүр ителгән эш, бурыс (ғәҙәттә намаҙ, төрлө дини йолаларға әйтелә). *Фарыз уҡыу. Биш фарыз.* **Фарыз бүлмәһе** мәсеттең намаҙ уҡый торған оло бүлмәһе.

**ФАСАД** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Йорттоң урам яҡҡа сыҡҡан алғы яғы. *Баҡса артында ҙур майҙан һәм был майҙанға культура һарайының бейек аҡ колонналы фасады сыға ине.* Ә. Вәли.

**ФАСИҠ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Әхлаҡ яҡтан аҙғын, боҙоҡ. *Ғашиҡ түгел, улар алдаусылар, улар ғайәт фасиҡ.* М. Ғафури.

**2.** Әшәке, бысраҡ. *Эсе тамам фасиҡ, хәйлә, золом тулыҡ. Мәғрифәткә хилаф тороп, ҡуҙе тоноп, һәр кешене гәйеплəп һөйләр имде* (Бәйеттән).

**ФАСОЛЬ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған баҡса үҫемлеге. *Фасоль түтәле.*

**2.** *йыйн.* Шул үҫемлектең аҙыҡ итеп ҡулланылған орлоғо. *Фасоль бутҡаһы.*

**ФАСОН** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Өҫ-баш һәм аяҡ кейемдәрен киҫеү, тегеү өсөн ҡулланылған үрнәк; кейемдең тегелеү формаһы. *Яңы фасон менән тегелгән кейем.* ■ *Иҫке фасон икән — бында ни хурлыҡ? Сәхнәнән бит күрһәтелә матурлыҡ!* М. Кәримов.

**2.** Нәмәнең тышҡы рәүеше. *Ҡала фасоны менән һалынған йорт.*

♦ **Фасон тотоу** рәүешен килтерергә тырышыу; ҡыланыу. **Фасон һаҡлау** заманса, мода менән кейенергә тырышыу. **Фасонын килтереү** тейешенсә, еренә еткереп кейенеү.

**ФАСОНЛЫ** *с.* **1.** Билдәле бер фасон буйынса тегелгән. *Фасонлы пальто.* ■ *Кейемдәрҙең дә тик яҡшы фасонлыһын .. ҡуҙҙең яуын алып торорлоғон теләй беҙҙең кеше.* «Совет Башҡортостаны», 1985 5 февраль.

**2.** Тышҡы күренеше, тышҡы рәүеше ҡатмарлы булған. *Фасонлы туҡыма.*

**ФАСЫЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Китаптың бер бүлеге. *Уҡый торған китабымдың уртаһында фасылы, яңы сыҡҡан китап уҡы, унда белем асылы* (Халыҡ йырынан).

**2.** Йыл миҙгеле. *Йыл фасылдары.* ■ *Уйлай [хан], йылда дүрт фасылға дүрт һарай. Һәр һарайҙа торор Фарһад дүртәр ай.* М. Харис. *Минең ғүмер һуҡмағымда йылдың нәҡ дүрт фасылы бар.* М. Кәримов.

● *Һәр фасылдың бер емеше бар.* Мәҡәл.

**ФАТАЛИЗМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Тәҡдир ҡушҡандан, яҙмыштан ҡотолоп булмай тигән ҡараш, уға ышаныу тойғоһо. *Дөрөҫ, бында [М. Ғафури ижадының тәүге осоронда] бер ни тиклем фатализм йәғни «яҙмыштан уҙмыш юҡ», «ярлыны ла, байҙы ла ҡәбер тигеҙләй» тигән идеялар һиҙелеп ҡала.* Ғ. Рамазанов.

**ФАТАЛИСТ** [*рус.*] *и.* Тәҡдирҙән, яҙмыштан ҡотолоп булмай тип ышанған кеше.

**ФАТИР** [*рус.* квартира ⟨ *нем.*] *и. һөйл.* **1.** Торлаҡ йорттоң бер ғаиләлек итеп бүленгән өлөшө; квартира. *Ике бүлмәле фатир. Яңы фатирға күсеү.* ■ *Беҙҙең фатир ҙур, айырым бүлмәләре бар.* Д. Юлтый.

**2.** Ваҡытлыса тороу йәки ҡунып сығыу өсөн ингән өй. *Фатир хужаһы. Фатир һорау. Фатирға төшөү.* ■ *Кискә табан Кәртәле ауылына ба-*

*рып еттек. Лəкин ауылда фатир табыу бик мөшкөл булды.* М. Ғафури.

**ФАТИРСЫ** *и. һөйл.* Фатирҙа торған кеше.

**ФАТИХА** [*ғəр.*] *и.* **1.** *дини* Ҡөрьəндең беренсе сүрəһе; ризалыҡ доғаһы. **Фатиха ҡылыу** *дини* хəйер-саҙаҡа алып, ризалыҡ доғаһы уҡыу. *[Ғəйни — муллаға:] Хəҙрəт, быйыл ашлыҡтарым яҡшы күренə. Хəҙерҙəн үк бер арба ғөшөргə фатиха ҡылып ҡуй əле.* Т. Йəнəби.

**2.** Уҡытыусы, оло кеше, ата-əсəнең кемгəлер ҡарата яҡшы телəге, ризалығы һəм шуны белдереп əйткəн һүҙе. *Ул ваҡытта үҙеңде уҡытҡан остаздың рөхсəтенəн, уның фатихаһынан башҡа икенсе məҙрəсəгə китеү харам ине, ярамай ине.* М. Ғафури. *Ата-əсə фатихаһынан ҡала, уҡытыусы ризалығын, уның да фатихаһын ишетергə тырышыу — беҙҙең йəштəрҙең һəммəһенең дə изге телəге ана шунда.* Х. Назаров. **Фатиха алыу** 1) *дини* кемдəндер үҙенə ҡарата əйтелгəн изге телəген ишетеү; 2) кемдəндер ризалығын алыу. *Хəсəн аҡһаҡал халыҡтың фатихаһын ала ла шул көндө үк оҙон юлға — шəжəрəгə мисəт баҫтырып алып ҡайтыр өсөн сəфəргə сыға.* Ə. Вахитов. **Фатиха биреү** ризалыҡ биреү, рөхсəт итеү. *Председатель һуҡранып булһа ла [Ғабдуллаға] фатихаһын бирҙе. — Ярай, ҡустым, .. үҙеңə бəхетле юл телəйем, тик ҡара уны, аҙып-туҙып китмə, .. тыуған ауылыңа тап төшөрмə.* Д. Исламов. **Фатихала булыу** изге телəк телəү, риза булыу.

**3.** *(баш хəреф менəн)* Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ФАТИХАЛАУ** *к.* Ризалыҡ биреү, рөхсəт итеү. *[Урынбаҫар — председателгə:] Үҙен саҡырып ныҡ ҡына бешергə лə, шуның менəн фатихаларға кəрəк.* З. Хисмəтуллин.

**ФА́УНА** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Билдəле бер урынға йəки геологик дəүергə ҡараған хайуандар донъяһы. *Арктика фаунаһы. Диңгеҙ фаунаһы. Сүл фаунаһы.* ■ *Яҙыусы [Н. Крашенинников] көньяҡ Уралдың бай, матур тəбиғəтенə Башҡортостандың флора һəм фаунаһын яҡшы белгəн һунарсы күҙе менəн ҡарай.* Ə. Усманов.

**ФАУНИ́СТИКА** [*рус.*] *и.* Зоологик географияның Ер шарындағы йəки уның бер өлөшөндəге хайуандар донъяһын өйрəнə торған бүлеге.

**ФАХИРАНƏ** [*фарс.*] *р. иҫк. кит.* Маҡтанғандай, маҡтанған һымаҡ. *Яңғыҙы алдан бара Иблис пəрей: мəхрурaнə, фахиранə төҫтəре.* Ш. Бабич.

**ФАХИШ** *с. кар.* **фəхиш.**

**ФАШ** [*ғəр.*]: **фаш булыу** халыҡҡа билдəле булыу; асылыу. *Исемең кушып йырлар инем, фаш булыр, тим өйəҙгə* (Халыҡ йырынан). **Фаш итеү** (*йəки* **ҡылыу**) халыҡҡа билдəле итеү; асыу. *Быҫраҡтарын илгə фаш иткəнгə, барыһы мине дошман күрҙелəр.* Ғ. Мəсғүт.

● *Утыҙ теш араһынан сыҡһа, утыҙ ауылға фаш булыр.* Мəҡəл.

**ФАШИ́ЗМ** [*рус.* 〈 *итал.*] *и.* Капитализмдың дөйөм кризисы дəүерендə капиталистик илдəрҙə барлыҡҡа килгəн империалистик буржуазияның иң реакцион, иң агрессив даирəлəре мəнфəғəтен ҡуҙəткəн политик ағым һəм монополистик капиталдағы иң реакцион көстəрҙең аяуһыҙ антикоммунизм, шовинизм, расизм менəн һуғарылған, бөтə демократик азатлыҡты быуған, башҡа илдəрҙə баҫып алыр өсөн ҡаты һуғыш асҡан террористик диктатураһы.

**ФАШИСЛАШЫУ** *к.* Фашизм режимына күсеү. *Фашислашҡан хөкүмəт.* ■ *Беренсе империалистик һуғыштан һуң.. Венгрияла эш башына буржуаз-миллəтсе хөкүмəт ултыра, .. артабан ул бөтөнлəй фашислаша һəм гитлерсы Германия менəн союздаш булып китə.* Ж. Кейекбаев.

**ФАШИ́СТ** [*рус.*] *и.* Фашизм яҡлы кеше; фашистик ойошма ағзаһы. *Фашист һалдаты.* ■ *Фашистар үҫал икəндəр, ҡоторған бүре кеүек.* Р. Ниғмəти.

**ФАШИСТИК** *с.* Фашизмға мөнəсəбəтле, фашисҡа хас. *Фашистик режим.*

**ФАШЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **фашлау.** *Фашланған енəйəт.*

**ФАШЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **фашлау.** *Енəйəтте фашлатыу.*

**ФАШЛАУ** *к.* **1.** Йəшерен нəмəне, кемдең йəки ниҙəндер йəшерен яғын билдəле итеү; асыу; фаш итеү. *Етешһеҙлекте фашлау.*

**2.** Кемдең йəки ниҙəндер ғəйебен, хатаһын асыу, күрһəтеү. *Иҫке тормошто фашлау. Империализмды фашлау.* ■ *Мəҫəл жанрында шағир [М. Ғафури] .. наҙанлыҡ, тиҫкəрелек һəм артта ҡалғанлыҡ күренештəрен фашланы.* Ғ. Рамазанов.

**ФАЭТО́Н** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Көймəле еңел арба. *Урамдан юрға аттарын бейетеп, һығылмалы билле фаэтондарын кəймəлдəтеп, һылыу-һылыу бисəлəр, йыуан, мөһабəт ирҙəр əленəн-əле уҙып китə тора.* З. Биишева.

**ФАЯ́НС** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Балсыҡҡа гипс һ. б. нəмəлəр ҡушып яһаған иҙмə (керамика өсөн ҡулланыла) *Күкшел фаянс. // Фаянс һауыт.*

**2.** *йыйн.* Шул иҙмəнəн яһалған, ялтыратылған һауыт-һаба.

**ФЕВРА́ЛЬ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Календарь йылының икенсе айы. *Февраль айы.* ■ *Февраль йөрөй ҡырҙар ҡыҙырып, ҡуҙ аҫкыһыҙ буран туҙҙырып.* А. Игебаев.

**ФЕДЕРАЛИ́ЗМ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Дəүлəт ҡоролошонда федерацияға (1 мəғ.) нигеҙлəнеү принцибы.

**2.** Федерация урынлаштырырға тырышҡан ҡайһы бер илдəрҙəге политик ағым.

**ФЕДЕРАЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* Федерализм яҡлы кеше.

**ФЕДЕРА́ЛЬ** [*рус.* федеральный] *и. кар.* **федератив.**

**ФЕДЕРАТИВ** *с.* Федерация (1 мəғ.) булып торған. *Федератив республика.*

**ФЕДЕРА́ЦИЯ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Билдəле юридик һəм политик үҙ аллылыҡҡа эйə булған дəүлəттəр берлəшмəһенəн торған дəүлəт ҡоролошо, шулай уҡ шундай ҡоролоштағы дəүлəт.

**2.** Йəмғиəт ойошмалары берекмəһе; союз. *Бөтə донъя профсоюздар федерацияһы.*

**ФЕЙЕРВЕ́РК** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Пиротехникала ҡулланылған тиҙ ҡабыныусан, сəсрəп яныусан ҡатышма һəм уны яндырғанда барлыҡҡа килгəн төрлө төҫтəге осҡонло уттар. *Аренала фейерверк уттары тоҡана.* ■ *Ҡапыл — ракета, икен-*

*сеһе .. күктә фейерверктар балҡый.* Ә. Бикчәнтәев.

**ФЕКЕР** [*гәр.*] *и.* **1.** *филос.* Объектив ысынбарлыҡтың аңда сағылышы. *Кешенең фекере фәҡәт тел аша, телмәр аша, йәғни һүҙ, һүҙ бәйләнештәре һәм һөйләмдәр аша ғына тыңлаусыға аңлайышлы бер хәлгә килә.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Башта тыуған уй. *Ҡыҙыҡлы фекер.* ■ *[Урынһыҙ] һорашып һөйләүсенең фекерен бүлергә ярамай.* Ғ. Амантай. *Дуҫ-иштәрем .. һеҙҙең менән донъя йәме арта, килә яҡты фекер, йылы һүҙ.* М. Хәй. **Фекер эйәһе** тәрән итеп уйлай, төрлесә фекер йөрөтә торған кеше. *Бөйөк фекер эйәһе һәм ялҡынлы революционер К. Маркс эшселәр синыфына һәм иҙелгән халыҡтарға .. ҡоллоҡтан ҡотолоу юлын социаль һәм рухи азатлыҡ яулап алыу юлын күрһәткән кеше булып тарихҡа инде.* «Совет Башҡортостаны», 1978, 6 май. **Фекер туплау** иғтибарҙы берәй нәмәгә йүнәлтеп, шул хаҡта ғына уйлау. *[Ишбулды] һөйләнә-һөйләнә башын тырнап торҙо бер аҙ фекер туплап.* И. Ғиззәтуллин.

**3.** Берәй нәмәгә ҡарата булған уй, ҡараш. *Үҙ фекерен әйтеү. Фекергә ҡушылыу. Яҡшы фекерҙә булыу.* ■ *Иптәштәрҙең фекерен белергә, поэмамды уҡымаҡсы булдым, миңә һөйләргә һүҙ бирҙеләр.* Ғ. Сәләм. **Фекер алышыу** берәй мәсьәлә буйынса үҙ ҡарашыңды әйтеп, башҡалар менән кәңәшләшеү. **Фекер тыуҙырыу** айырым кешегә ҡарата билдәле бер ҡараш тыуҙырыу, фекер уятыу. *Ямай юғарынан килгән һәр бер вәкил менән үҙе һөйләшә. Һәр килгән вәкилгә, уның һүҙенә үҙе нарыҡ бирә, уның тураһында йәмәғәт фекере тыуҙыра.* Д. Юлтый.

**4.** Теге йәки был эҫәрҙәге әйтергә теләгән төп уй; идея. *Художник та шулай: ул да .. яңы фекерҙе алға ҡуя.* С. Агиш.

□ **Фекер итеү** (*йәки* **йөрөтөү**) уйлау, фекерләү. *Атаһы асыуланмаған уға [Таңатарға]. Ул хатта улының аҡыллы фекер йөрөтөүенә шатланған.* Ә. Вахитов.

● *Юғарыға ҡарап фекер ит, түбәнгә ҡарап шөкөр ит.* Мәҡәл.

**ФЕКЕРҘӘШ** *и.* Бер үк фекерҙе яҡлаған, бер үк фекерҙәге кешеләр. *Литваның атаҡлы шағирҙары менән замандаш, табындаш, фекерҙәш, йәғни дуҫтар булыуым өсөн мин бик кәнәғәтмен һәм ғорурланам.* М. Кәрим.

**ФЕКЕРЛЕ** *с.* Үҙ фекере булған. *[Ләйлә] саф күңелле бер ҡыҙ ине. Белеме аҙ, ләкин асыҡ фекерле, ҡатынлыҡтың иң йәшерен серҙәре менән биҙәлгән ине.* М. Ғафури.

**ФЕКЕРЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **фекерләү** 2. *Культура тарихы .. әлегә эшләнмәгән һәм ғилми яҡтан фекерләнмәгән.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 29 май.

**ФЕКЕРЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Объектив ысынбарлыҡты аңда сағылдырыу. *Фекерләү ерҙән, конкрет нәмәнән башлана; унан әкренләп дөйөмгә, абстракт бейеклеккә үрләй.* Ә. Хәкимов.

**2.** Уйлау, фекер итеү. *[Фуат] үҙенең ни тиклем һай фекерләүен, кешеләрҙең ни тиклем ҙур йөрәкле булыуҙарын күргән.* Р. Ғабдрахманов.

**ФЕКЕРЛӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **фекерләү** 1. *Тиештеләр үҙ-ара, уйлашып, фекерләшеп: «Кәрәк икән тормошта йәшәргә бергәләшеп».* Ғ. Амантай.

**ФЕКЕРҺЕҘ** *с.* Үҙ фекере булмаған, тәрән итеп уйламаған. *Фекерһеҙерәк әҙәм балаһы ни кәҙәр ҡайғы-хәсрәт күрмәһен, әгәр бынан ҡотолһа, уларҙы бик тиҙ онота.* М. Ғафури.

**ФЕЛЬДМА́РШАЛ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Революцияға тиклемге рус армияһында генералға бирелгән иң юғары чин һәм шул чиндағы кеше.

**2.** Ҡайһы бер сит илдәрҙең ҡоро ерҙә хеҙмәт итеүсе ғәскәрендә иң юғары хәрби дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше.

**ФЕЛЬДМАРШАЛЛЫҠ** *и.* Фельдмаршал дәрәжәһе.

**ФЕЛЬДФЕ́БЕЛЬ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Революцияға тиклем рус армияһында шулай уҡ ҡайһы бер сит ил ғәскәрҙәренең пехота, артиллерия һәм инженерҙар войскаһында өлкән унтер офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше. *Кискә табан фельдфебель бөтә ротаны смотрға теҙҙе.* А. Таһиров.

**ФЕ́ЛЬДШЕР** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Махсус урта белемле медицина хеҙмәткәре; врач ярҙамсыһы. *Фельдшерҙар курсы. Мал фельдшеры. Фельдшер булып эшләү.*

**ФЕЛЬЕТО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Тормоштағы етешһеҙлек һәм насарлыҡтан көлөп, фашлап яҙған газета һәм журнал мәҡәләһе. *Фельетон яҙыу.*

**ФЕЛЬЕТОНСЫ** *и.* Фельетон яҙыусы.

**ФЕЛӘК** *и. һөйл. ҡар.* **фляга** 1.

**ФЕНО́Л** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. хим.* Бензолдан алынған, медицинала антисептика һәм дезинфекция өсөн ҡулланылған органик берләшмә; карбол кислотаһы.

**ФЕНО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Фенология буйынса белгес.

**ФЕНОЛОГИК** *с.* Фенологияға мөнәсәбәтле. *Фенологик күҙәтмәләр. Фенологик календарь.*

**ФЕНОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Үҫемлек һәм хайуандар донъяһындағы йыл миҙгелдәренә һәм тәбиғәт шарттарының үҙгәреүенә бәйле күренештәрҙе өйрәнә торған фән.

**ФЕНОМЕНАЛЬ** [*рус.* феноменальный] *с.* Һирәк осрай торған, иҫ киткес, ғәжәп итерлек булған. *Феноменаль комартҡы. Феноменаль хәтер.*

**ФЕОДА́Л** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. тар.* Феодализм осоронда хакимлек итеүсе синыф вәкиле.

**ФЕОДАЛИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Ҡол биләүселек ҡоролошонан һуң килгән, феодалдарҙың етештереү сараларына тулыһынса, крәҫтиәндәргә өлөшсә хужа булыуына нигеҙләнгән ижтимағи-политик формация. *Феодализм ҡоролошо. Феодализм дәүере.*

**ФЕОДАЛЬ** [*рус.* феодальный] *с.* Феодализм принциптарына нигеҙләнгән. *Феодаль ҡоролош. Феодаль дәүләт.*

**ФЕРЗЬ** [рус. ⟨ *төрөк.*] *и.* Шахмат уйынындағы иң көслө фигура.

**ФЁРМА**[1] [*рус.*] *и.* **1.** Колхоз-совхоздың йәки ауыл хужалығы уҡыу йортоноң малсылыҡ менән шөғөлләнгән махсус хужалығы. *Ҡошсолоҡ фермаһы. Йылҡысылыҡ фермаһы. Сыҡсасылыҡ фермаһы. Һөтсөлөк фермаһы. Ферма мөдире. Ферма эшсеһе.* / Шул хужалыҡ урынлашҡан

йорт-ҡаралты. *Ферма кирбестән һалынған, түбәләре шифр менән ябылған ҙур-ҙур ике һарайҙан тора.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 7 ғинуар.

**2.** Капиталистик илдәрҙә: ауыл хужалығы менән шөғөлләнгән хосуси хужалыҡ.

**ФЕ́РМА**[2] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. тех.* Ҡорос терәктәрҙең остарын бер-беренә беркетеп яһаған инженерлыҡ ҡоролмаһы. *Һыуға сумып ятҡан фермаларын өҫкә күтәрәләр күперҙәр.* Ә. Вәли.

**ФЕРМЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. биол., хим.* Күҙәнәктәрҙә барлыҡҡа килгән, матдәләр алмашыныуын тиҙләтә торған ҡатмарлы аҡһым матдә.

**ФЕ́РМЕР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Капиталистик илдәрҙәге ферма [1] (2 мәғ.) хужаһы йәки арендатор. *Крәҫтиәндәрҙең һәм фермерҙарҙың хәле һиҙелерлек насарая: бер хужалыҡтар бөлгөнлөккә төшә, уларҙың элекке хужалары ялланма хеҙмәт кешеләренең сафтарын тулыландыра.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.

**ФЕСТИВА́ЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Сәнғәт өлкәһенең билдәле бер тармағындағы ижади уңышлыҡтарҙы күрһәтеүгә бағышланған, халыҡ ҡатнашлығында үткәрелгән байрам. *Театр фестивале. Бөтә донъя фестивале. Фестиваль көндәре.*

**ФЕТИ́Ш** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Дингә ышаныусыларҙың ҡарашы буйынса, тәбиғәттән тыш көскә эйә тип иҫәпләнгән, шуның өсөн табыныу объекты булып хеҙмәт иткән нәмә.

**2.** *күсм.* Ҙур ышаныс менән табынып ҡараған нәмә. *Тауар арзан һатылһа, ҡыйбат алынһа ла, нишләйһең — баҙар бит, һәр кем баҙарҙы фетиш итеү рәүешендә үҙ-ара аңлаша ине.* Ғ. Ғисмәти.

**ФЕТИШИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* **1.** Фетишҡа (1 мәғ.) табыныу.

**2.** *күсм.* Нимәгәлер һуҡырҙарса табыныу.

**ФЕТИШЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Фетишҡа (2 мәғ.) әйләндереү, фетиш итеү.

**ФЕТНӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Хөкүмәткә ҡаршы ойошторолған ҡораллы сығыш. *Кулактар фетнәһе. Фетнә күтәреү. Фетнәне баҫыу.* / Сыуалыш, бола. *Фетнә һалыу.* ■ *Фетнәнең күбе сығар телебеҙҙән.* Аҡмулла.

**2.** *күсм.* Боҙоҡлоҡ, насарлыҡ килтергән кеше. *Осраған бер фетнәгә күҙ ҡыҫма.* Ш. Бабич.

● *Алтын-көмөш күп ерҙә фетнә күп.* Мәҡәл.

**ФЕТНӘСЕ** *и.* Фетнәлә ҡатнашҡан кеше.

**ФЕТР** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Яҡшы йөндән баҫылған юғары сифатлы йоҡа беше кейеҙ. // *Фетр бүймә.* ■ *Нурый ҙа башына киң ситле фетр эшләпә кейгән, ҡулына шыма таяҡ тотҡан.* А. Таһиров.

**ФЕХТОВА́НИЕ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Алышта рапира, шпага, ҡылыс ҡулланыу оҫталығын күрһәтеүҙән ғибәрәт спорт төрө. *Фехтование буйынса ярыш.*

**ФИА́ЛКА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. ҡар.* **миләүшә.**

**ФИ́БРА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Тығыҙ итеп ҡыҫылған, химик юл менән эшкәртелгән ҡағыҙ массаһы (ғәҙәттә сумаҙандар көпләү һәм изоляция өсөн ҡулланыла).

**ФИБРИ́Н** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. физиол.* Ҡан ойоғанда барлыҡҡа килгән иремәй торған аҡһым матдә.

**ФИГУ́РА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Берәй нәмәнең тышҡы рәүеше. *Теплоход алға барған һайын фигураһы .. асыҡлана.* Ә. Ихсан. / *мат.* Яҫылыҡтың йомоҡ һыҙыҡ менән сикләнгән өлөшө, шулай уҡ билдәле бер рәүештә урынлашҡан нөктә, һыҙыҡ, яҫылыҡ һәм есемдәр йыйымы.

**2.** Кем йәки нимәнеңдер хәрәкәтләнгәндәге йәки берәй эш башҡарғандағы (бейегәндә, конькиҙа шыуғанда һ. б.) торошо. *[Индрил:] Һеҙ һыуҙың урғылған урынын ҡарағыҙ әле, гәжәп төрлө фигуралар яһай ул.* Д. Юлтый. *Отделение командирҙары манеж түңәрәге буйлап төрлө фигуралар яһай. Күп кенә гәләмәттәр яһап була икән ат менән* «Совет Башҡортостаны», 1969, 7 декабрь.

**3.** *муз.* Музыкаль әҫәрҙе биҙәй торған ритмик-мелодик элемент.

**4.** *әҙ.* Әҙәби телмәрҙең тәьҫир көсөн арттырыу өсөн ҡулланылған стилистик алым.

**5.** Кеше йәки хайуандың сәнғәт әҫәрендәге һыны. *Монументаль фигура.* / Әҙәбиәттә — яҙыусы, сәхнәлә — актер тарафынан тыуҙырылған образ, характер. *Операла психологик яҡтан бик ҡатмарлы булған Емельян Пугачев фигураһы ла бик уңышлы асып бирелгән.* «Ағиҙел», 1968, № 5.

**6.** Кешенең тышҡы тән төҙөлөшө. *Матур фигуралы кеше.* ■ *[Бисәм:] «Фигурам боҙола, миңә күп ашарға ярамай»,— тип, гел генә шоколад ашай башланы.* З. Хисмәтуллин.

**7.** Шахмат уйынындағы оло шаҡмаҡтар (фил, ат, ладья, ферзь, шах). *Аш булмәһендәге өҫтәлдә шахмат тактаһы ята, өҫтөңә фигуралар теҙелгән.* Ә. Бикчәнтәев.

**ФИГУРАЛЫ** *с.* Төрлө фигура (2 мәғ.) менән башҡарылған. *Конькиҙа фигуралы шыуыусыларҙың ярышы башланды. Унда илдең иң көслө фигуристары ҡатнаша.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 20 март.

**ФИГУРИ́СТ** [*рус.*] *и.* Конькиҙа төрлө фигура (2 мәғ.) яһап шыуған спортсмен. *Фигуристар ярышы.*

**ФИҒЕЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Эш, хәрәкәт. *Түрә тимә, ҡара тимә, фиғелен ҡара. Кәй яман арғымаҡтан мәстәк уҙар.* Аҡмулла.

**2.** Ҡылыҡ, холоҡ. *Яҡшы фиғелле кеше.* ■ *Йоҡлап ятҡан кешене үлтереү ерәтлек түгел, батырҙар фиғеле түгел* (Әкиәттән). *Аҡыл фиғел һәм мөхәббәт тормошта көн дә кәрәк* (Халыҡ йырынан).

**ФИҒЕЛҺЕҘ** *с. иҫк.* Насар холоҡло; холоҡһоҙ.

**ФИДАИ** *с. иҫк.* Йәнен фиҙа ҡылған (кешегә ҡарата). *Ҡыуан аңлап, эй Ватан, .. мендерербеҙ даныңды; беҙ фидаи һинең өсөн — йәшәтербеҙ намыңды!* Ш. Бабич.

**ФИДИӘ** [*ғәр.*] *и. дини* Үлгән кешенең малынан муллаға бирелә торған хәйер. *Беҙҙең аҡтыҡ бейәне фидиәгә биреү тураһында һөйләштеләр.* М. Ғафури.

**ФИҘА** [*ғәр.*] *и.* Кем йәки нимәләр хаҡына ғазап сигергә, үҙен ҡорбан итергә әҙер булғанды белдереп әйтелә. **Фиҙа булыу** кем йәки нимәләр өсөн ғазап сигеү, ҡорбан булыу. ■ *Йәш сағым, алтын сағым, ялҡын сағым булһын фиҙа халҡым алдында минең биргән таҙа антым өсөн.* Ш. Бабич. **Фиҙа итеү** (*йәки* **ҡылыу**) кем йәки нимәләр өсөн үҙен йәлләмәй ҡорбан итеү. *Йәнде фиҙа ҡылыу.* ■ *Һалдаттар! Һеҙ, азатлыҡ өсөн көрәшеүселәрҙең, шул юлда йәндәрен фиҙа итеүселәрҙең*

*үҙегеҙ кеүек эшсе-крәҫтиән балалары икәнен аңларға тейешһегеҙ.* М. Ғафури.

● *Тура һүҙгә йән фиҙа.* Мәҡәл.

**ФИҘАКӘР** [*фарс.*] *с.* Үҙен-үҙе аямаған, берәй нәмәгә ысын күңелдән бирелгән. *Фиҙакәр көрәш. Фиҙакәр мөхәббәт. Фиҙакәр хеҙмәт. Фиҙакәр ярҙам.* ■ *Ҙур маҡсаттар һине фиҙакәр эшкә рухландыра.* И. Ғиззәтуллин. // *Педагогик коллективтар белем биреүҙең яңы реформаһын уңышлы бойомға ашырыу өсөн фиҙакәр эшләй.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 7 июнь.

**ФИҘАКӘРЛЕК** *и.* Үҙен-үҙе аямаусанлыҡ, нимәгәлер ысын күңелдән бирелгәнлек. *Фиҙакәрлек күрһәтеү.* ■ *Совет кешеләренең фиҙакәрлеге һәм батырлығы, революция идеяларына тоғролоғо һәм аңлы дисциплинаһы донъяла һоҡланыу тойғоһо тыуҙыра.* «Совет Башҡортостаны», 1977, 5 ноябрь.

**ФИ́ЗИК** [*рус.*] *и.* Физика өлкәһендә эшләгән белгес.

**ФИЗИ́К** *с.* **1.** Физикаға мөнәсәбәтле. *Физик теория.*

**2.** Физика өйрәнгән күренештәргә мөнәсәбәтле. *Физик процесс. Тупраҡтың физик үҙенсәлеге.* / Физика өйрәнеү өсөн кәрәк булған, тәғәйенләнгән. *Физик приборҙар.*

**3.** Кеше организмына, уның төҙөлөшөнә мөнәсәбәтле. .. *Үҙе физкультура менән мауыҡҡан Тимер Янһаров физик яҡтан таҙа кешеләрҙе хөрмәтләй.* Б. Бикбай.

**4.** Мускул эшмәкәрлегенә мөнәсәбәтле. *Физик тәрбиә. Физик хеҙмәт.* ■ *Физик күнекмәләр организмдың эшмәкәрлеген активлаштыра.*

♦ **Физик география** Ер өҫтөн, уның тәбиғи шарттарын, үҫемлек һәм хайуандар донъяһын өйрәнә торған фән. **Физик культура** *ҡар.* **физкультура. Физик химия** физика методтары ярҙамында химик күренештәрҙе өйрәнә торған фән.

**ФИ́ЗИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Материяның үҙенсәлеген, төҙөлөшөн һәм хәрәкәт итеү закондарын өйрәнә торған фән. *Теоретик физика.* / Ошо фәндең материялағы ниндәйҙер бер форманың дөйөм үҙенсәлектәрен, төҙөлөшөн өйрәнгән бүлеге. *Атмосфера физикаһы. Диңгеҙ физикаһы. Ер физикаһы.*

**ФИЗИО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Физиология буйынса белгес.

**ФИЗИОЛОГИК** *с.* **1.** Физиологияға мөнәсәбәтле. *Физиологик тикшеренеүҙәр. Тикшеренеүҙең физиологик методтары.*

**2.** Организмдың физиологияһына, уның йәшәү һәләтлегенә бәйле. *Хайуандарҙың физиологик үҙенсәлектәре. Физиологик процесс.*

**ФИЗИОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тән һәм тән ағзаларының тереклек функцияларын, тереклек эшмәкәрлеген өйрәнә торған фән. *Дөйөм физиология.* / Тереклек функциялары, тереклек эшмәкәрлеге һәм шуларҙың закондары. *Һулыш физиологияһы. Үҙәк нервы системаһының физиологияһы.*

♦ **Телмәр өндәре физиологияһы** фонетиканың телмәр органдары төҙөлөшөн, уларҙың эшмәкәрлеген өйрәнә торған бүлеге. **Үҫемлектәр физиологияһы** үҫемлек организмы тереклегенең дөйөм законлыҡтарын өйрәнә торған фән.

**ФИЗИОТЕРАПЕ́ВТ** [*рус.*] *и.* Физиотерапия буйынса белгес, врач.

**ФИЗИОТЕРАПЕВТИК** *с.* Физиотерапияға мөнәсәбәтле. *Физиотерапевтик процедура. Физиотерапевтик кабинет.*

**ФИЗИОТЕРАПИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Медицинала физик факторҙарҙың (яҡтылыҡ, йылылыҡ, электр һ. б.) организмға тәьҫир итеү көсөн өйрәнә торған бүлек, шулай уҡ ошо факторҙарҙың ауырыуҙарҙы дауалау һәм уларҙы булдырмау маҡсатында ҡулланылышы.

**ФИЗКУЛЬТУ́РА** [*рус.*] *и.* Физик күнекмәләр ярҙамында тәнде нығытыу ысулы; физик культура. *Физкультура күнекмәләре. Физкультура менән шөғөлләнеү.*

♦ **Дауалау физкультураһы** медицинала физкультура методтары ярҙамында ауырыуҙарҙы дауалау һәм уларҙы булдырмау юлдарын өйрәнгән бүлек.

**ФИЗКУЛЬТУ́РНИК** [*рус.*] *и.* Систематик һәм профессиональ рәүештә спорт менән шөғөлләнгән кеше. *Физкультурниктар ярышы. Физкультурниктар парады.*

**ФИКСА́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Асыҡланған фото пленкаһын йыуыу һәм ундағы һүрәтте нығытыу өсөн ҡулланылған химик иретмә.

**ФИКСАЖЛАУ** *ҡ.* Фиксаж менән фотолағы һүрәтте нығытыу.

**ФИ́КУС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Тут ағастары ғаиләһенә ҡараған мәңге йәшел ағас. / Эре, оҙонса япраҡлы бүлмә гөлө. *Оло диван эргәһендә фикус үҫеп ултыра.* Т. Арслан.

**ФИКҺЕ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ислам дине билдәләгән ижтимағи тәртип ҡағиҙәләре. *Фикһе китабы.*

**ФИЛ** [*фарс.*] *и.* Тропик Африкала һәм Азияла үлән менән туҡланып йәшәгән, оҙон томшоҡло, ике оҙон ҡаҙыҡ тешле бик ҙур һөтимәр хайуан. *Ата фил. Инә фил. Африка филе. Һиндостан филе.*

● *Боландың—мөгөҙө, ғалимдың—һүҙе, филдең—теше, оҫтаның эше ҡиммәт.* Мәҡәл.

**ФИЛАРМО́НИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Концерт биреү, музыкаль сәнғәтте пропагандалау эшен башҡарған ойошма йәки учреждение. *Филармония артисы. Филармония концерты.* / Шул ойошма урынлашҡан бина. *Филармонияға барыу.*

**ФИЛАСЫЛ** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Асылда, нигеҙҙә. *Филасыл эшебеҙ даим һәләкәт, башыбыҙға килә төрлө фәләкәт.* С. Яҡшығолов.

**ФИЛАТЕЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* Филателия менән шөғөлләнгән кеше. *Филателистар түңәрәге.*

**ФИЛАТЕЛИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Почта маркаларын, герблы маркаларҙы, маркалы һәм штамплы конверттарҙы йыйыу, өйрәнеү.

**ФИЛЁНКА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Бер төҫтө икенсеһенән айырыу өсөн һыҙылған тар һыҙыҡ. *Стенаға филёнка һыҙыу.*

**ФИЛИА́Л** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ҙур предприятие, учреждение йәки ойошманың билдәле бер урындағы үҙ аллы бүлеге. *В. И. Ленин музейының филиалы.*

**ФИЛО́ЛОГ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Филология буйынса белгес.

**ФИЛОЛОГИК** *с.* Филологияға бәйләнешле, филологияға ҡараған. *Филологик хеҙмәт.* / Фи-

логия методтарына нигеҙләнгән. *Филологик анализ.*

**ФИЛОЛО́ГИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Яҙма текстарҙың телен, эстәлеген һәм стилен анализлау нигеҙендә билдәле бер йәмғиәттең тарихын, культураһын өйрәнә торған гуманитар фәндәр йыйылмаһы. *Антик филология. Филология факультеты. Филология фәне.* ■ *Башҡорт филологияһы проблемалары хаҡында Бөтә Союз һәм халыҡ-ара конгрестарҙа доклад менән сығыш яһауҙар йышайҙы.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 17 ноябрь.

**ФИЛО́СОФ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Философия буйынса белгес.

**ФИЛОСОФИК** *с. кит.* **1.** Философияға (1 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Философик фекер. Философик ҡараш. Философик материализм.*

**2.** Донъяға ҡараш концепцияларын сағылдырған тәрән фекерле. *Философик драма. Философик повесть.*

**ФИЛОСО́ФИЯ** [*рус.* 〈 *гр.*] *и. кит.* **1.** Тәбиғәт, йәмғиәт һәм фекер үҫешенең дөйөм закондары тураһындағы фән. *Боронго философия. Марксистик философия. Философия тарихы.* / Айырым бер ғалимдың философик тәғлимәте. *Гегель философияһы. Маркс философияһы.*

**2.** Ниндәй ҙә булһа бер фәндең нигеҙен тәшкил иткән методологик принциптар. *Математика философияһы.*

**3.** *һөйл.* Буш һүҙ, фәлсәфә.

**ФИЛТӘ** *и.* Йылыта йәки яҡтырта торған приборҙарҙа яныу өсөн ҡуйылған тар ғына туҡыма киҫәге, таҫма, шнур; милтә.

**ФИЛУАҠИҒ** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Ғәмәлдә. *Филуакиг беҙ икебеҙ бер ишлебеҙ.* С. Яҡшығолов.

**ФИЛҮР** *и. һөйл.* Эре аҡ биҙәкле яулыҡ.

**ФИЛХӘЛ** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Шунда уҡ, бик тиҙ. *Беҙҙе күрһә, филхәл улар каса башлай, яҡ-ягына ҡарай-ҡарай ҡырын-ярын.* С. Яҡшығолов.

**ФИЛЬМ** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* Экранда күрһәтеү өсөн киноға төшөргән әҫәр. *Документаль фильм. Нәфис фильм. Хроникаль фильм.*

**ФИЛЬМОСКО́П** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Диафильмдың хәрәкәтһеҙ һүрәттәрен окуляр аша йәки экранға төшөрөп ҡарау өсөн хеҙмәт иткән аппарат.

**ФИЛЬМОТЕ́КА** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Фильмдарҙы йыйып һаҡлай торған учреждение йәки киностудияның бүлеге.

**ФИЛЬТР** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Шыйыҡлыҡ һәм газды кәрәкмәгән ҡушымталарҙан таҙарта торған ҡулайлама йәки матдә; һөҙгөс. *Ком фильтр. Һыуҙы фильтр аша үткәреп таҙартыу.* / *махс.* Нур, электр ағымы йәки башҡа нәмәне тота, кәметә торған ҡулайлама. *Яҡтылыҡ фильтры. Тауыш фильтры. Акустик фильтр.*

**ФИЛЬТРА́Т** [*рус.*] *и.* Фильтр аша үткәрелгән шыйыҡлыҡ.

**ФИЛЬТРЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **фильтрлау.** *Фильтрланган һыу.*

**ФИЛЬТРЛАУ** *к.* Фильтр аша үткәреү; һөҙөү. *Һыуҙы фильтрлау.*

**ФИН** *и.* Финляндияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (уғыр-фин телдәренең береһендә һөйләшә). *Фин халкы. Фин ҡатыны. Фин теле.*

**ФИНА́Л** [*рус.* 〈 *ит.*] *и.* **1.** Ниҙеңдер аҙағы, һуңы. *Вакиганың финалы.*

**2.** Бер нисә өлөштән торған музыкаль әҫәрҙең һуңғы өлөшө. *Симфония финалы. Фортепьяно өсөн яҙылган концерттың финалы.* / Операның, опереттаның, балеттың йәки уларҙың айырым акттарының һуңғы күренеше.

**3.** Спорт ярышындағы еңеүселәрҙе билдәләй торған һуңғы хәл иткес алыш. *Финал ярышы. Финалга сыгыу.*

**ФИНАНС** [*рус.* финансы 〈 *фр.*] *и.* **1.** Дәүләт йәки предприятие ҡарамағында булған бөтә аҡса һәм уны булдырыу, файҙаланыу системаһы. *Финанс министры. Дәүләт финансы. Финанс операцияһы.*

**2.** *һөйл.* Аҡса эштәре.

**ФИНАНСИ́СТ** [*рус.*] *и.* **1.** Финанс эштәре буйынса белгес. *Финансист .. бөтә ил хужалыгының тормош ритмын һиҙеп торорга тейеш.* «Ағиҙел», 1986, № 4. / Финанс фәндәре өлкәһендә эшләгән белгес.

**2.** Ҙур аҡса эштәре алып барған капиталист.

**ФИНАНСЛАУ** *к.* Аҡса, финанс менән тәьмин итеү. *Хужалыкты финанслау. Яңы төҙөлөштө финанслау.*

**ФИ́НИШ** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* **1.** Тиҙлеккә үткәрелә торған спорт ярыштарының һуңғы өлөшө.

**2.** Шул ярыш юлының һуңғы нөктәһе. *Финиш һыҙыгы. Финишка етеү.*

**ФИ́НКА** [*рус.*] *и.* Ҡынға тығып йөрөтә торған ҡыҫҡа, ҡалын бысаҡ. *Билгә финка тагыу.*

**ФИО́РД** [*рус.* 〈 *норв.*] *и.* Текә ҡаялар араһындағы оҙон, тар диңгеҙ ҡултығы.

**ФИРАҠ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Айырма. *Арабыҙҙа икебеҙҙең бер фирак юк.* С. Яҡшығолов.

**2.** Айырылышҡан хәл, айырылышмаҡ. *Куп-куп вакыттар булган йыракта, илкәйен ташлап, йөрөгән фиракта.* Д. Юлтый.

□ **Фираҡ булыу** айырылыу, айырылышыу. *Атам, әсәм, тугандарым, фирак булдым һеҙҙәрҙән* (Бәйеттән).

**ФИРАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡасыу, ҡасып киткән хәл. *Былар шаһларына баги фирарҙар, хәмәлле эт кеүек яйҙы ҡарарҙар.* М. Өмөтбаев.

**ФИРАСӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Зирәклек, һиҙгерлек.

**ФИРАСӘТЛЕ** *с. иҫк.* Зирәк, һиҙгер. *Иҙеүкәй фирасәтле бер кеше булганлыктан, уга .. йәберләнгән халыктар хөкөмгә килә башлайҙар.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

**ФИРҒӘҮЕН** [*ғәр.*] *и. тар.* Боронғо Мысыр батшаһының исеме. *Һәр Мусага бер фиргәүен тигәндәйен, калыптыр бойорок булып гөләмәнән.* Аҡмулла.

**2.** *кусм.* Ҡаты күңелле, уҫал кеше; залим. *Эшсене куп иҙҙеләр, улар һаман түҙҙеләр, фиргәүендәр, карундар йөрәк майын һыҙҙылыр.* Ш. Бабич.

◆ **Мысыр фирғәүене** илһеҙ-ерһеҙ кеше. *[Карт:] Тыуган иленән колак каккан Мысыр фиргәүене бит һин.* Д. Исламов. **Фирғәүен һаҡалы** *диал.* тамсы гөлө (*ҡар.* **гөл**).

**ФИРҘӘҮЕС** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Баҡса, йәннәт баҡсаһы. *Өфө, Ҡырым сахралары фирҙәү-*

*естәй, бында йөрөһәң бар ҡайғылар иҫкә төшмәй.* М. Ғафури.

**2.** Йәннәт, ожмах. *Фирҙәүестә бар ине бер хур ҡыҙы, барса хурҙарҙан матур ул бер үҙе.* Ш. Бабич.

**3.** *(баш хәреф менән)* Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ФИРЕШТӘ** *и. кар.* **фәрештә.**

**ФИРҠӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Политик ойошма, партия. *Коммуна ҡукрәгә — был данлы фирҡә, мине үҫтерҙе тирбәтеп ҡукрәгендә.* Б. Ишемғол.

**2.** Төркөм. *Буленгән был халыҡтар кисә фирҡә: бере фәкир, бере бай, бере урта.* М. Ғафури.

**3.** Дивизия. *Төндә сәғәт берҙә, Тоҙтүбә фронтына вокзалдан ҡыҙыл гвартия фирҡәһе китергә тейеш ине.* З. Шәрҡи.

**ФИРҠӘЛЕ** *с. иҫк. кит.* Политик ойошмала ағза булып торған, партиялы. *Фирҡәле кеше.*

**ФИРҠӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Айырылышыу. *Тыуған илдән айырып, фирҡәт утына һалдылар.* Д. Юлтый.

**ФИРҠӘҺЕҘ** *с.* Фирҡәлә (1 мәғ.) ағза булып тормаған. *Фирҡәһеҙ кеше.*

**ФИ́РМА** [*рус.* 〈 *ит.*] *и.* Үҙ маркаһы менән тауар эшләргә һәм һатырға юридик хоҡуғы булған сауҙа йәки промышленность предприятиеһы. *«Мир» кейем тегеү фирмаһы. Сауҙа фирмаһы.*

**ФИРҮЗ** [*фарс.*] *с.* Бейеклеге менән өҫтөн булған, айырылып торған. *Мөһабәт фирүз тауҙар.* ■ *Фирүз ярлы Һаҡмар буйында йәш дөйәләй үркәсләнеп торған Йыр тауы бар.* Й. Солтанов.

**ФИРҮЗӘ** [*фарс.*] *и.* **1.** Зәңгәр йәки йәшкелт зәңгәр төҫтәге минерал, биҙәү әйбере эшләү өсөн ҡулланылған аҫыл таш. *Фирүзә ҡашлы беләҙек.* ■ *Аллаяр мулла бер һандыҡ кеүек нәмәһен асты ла зөбәржәт, фирүзә, ынйы, гәрәбә, мәрйен, аҡыҡ, йәшен ташы, кояш күҙе кеүек ҡиммәтле таштарын Маврингә күрһәтеп сыҡты.* Ш. Шәһәр.

**2.** *(баш хәреф менән)* Ҡатын-ҡыҙ исеме.

● *Фирүзә ташы — йөҙөк ҡашы.* Әйтем.

**ФИСГАРМО́НИЯ** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Яңғырашы менән органға оҡшаған баҫмаҡлы, тынлы музыка ҡоралы.

**ФИТОНЦИ́Д** [*рус.* фитонциды 〈 *гр.*] *и. махс.* Бактерияларҙы, микроскопик бәшмәктәрҙе үлтерә йәки уларҙың үҫеүен туҡтата торған, үҫемлектәр бүлеп сығарған биологик актив матдә.

**ФИТРӘТ** [1] [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ниндәйҙер ҙур ике ваҡиға араһындағы осор. *Фитрәт заманы.*

**ФИТРӘТ** [2] [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Кемдеңдер тыумышы, яратылышы. *Юҡ, Хәсән Ғәли, тамыр йәймәҫ татарға хеҙмәтең, әйе, һин ҡырғыҙға эшләш, сөнки ҡырғыҙ фитрәтең.* Ш. Бабич. / Ошо яратыштан килгән үҙенсәлек.

**2.** Кеше ҡулы теймәгән тәбиғәт. *Ул заманда ерҙә пак фитрәт ине, һәр әҙәмдә ҡарҙан аҡ күкрәк ине.* Ш. Бабич.

**ФИХАСИЛ** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Һөҙөмтәлә. *Фихасил бик аяныс, ҡурҡыныс хәл.* С. Яҡшығолов.

**ФЛАГ** [*рус.* 〈 *гол.*] *и.* Төҫө һәм формаһы билдәләнеп, нимәнеңдер символы итеп ҡабул ителгән ағасҡа йәки бауға беркетелгән, ғәҙәттә гербле, эмблемалы туҡыма киҫәге; байраҡ. *Ҡыҙыл флаг.* ■ *Шул ваҡыт демонстрация тулҡыны ҡапыл майҙанға һирпелде. Флагтар менән эшселәр колонналары ағыла башланылар.* Д. Юлтый. *БАССР-ҙың Дәүләт флагы булып РСФСР-ҙың Дәүләт флагы һанала.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**ФЛА́ГМАН** [*рус.* 〈 *гол.*] *и.* **1.** Ҙур хәрби караптар төркөмөнөң (эскадрондың, дивизияның) башлығы.

**2.** Шул башлыҡ урынлашҡан карап.

**3.** *күсм.* Алғы сафта барыусы; алдынғы. *Республикабыҙ энергетикабыҙҙың флагманы тип йөрөтәләр Ҡарман ГРЭС-ын. Ошо биш йыллыҡта сафҡа баҫасаҡ иң ҙур объекттарҙың береһе ул.* Ғ. Шәрипов.

**ФЛАГШТО́К** [*рус.* 〈 *гол.*] *и.* Флагты элә, күтәрә торған ҡолға.

**ФЛАКО́Н** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Ғәҙәттә хушбый һалынған бәләкәй шешә. *Бер флакон хушбый. Флакон ҡапҡасы.*

**ФЛАМИ́НГО** [*рус.* 〈 *порт.*] *и.* Тропик һәм субтропик илдәрҙә йәшәй торған оҙон муйынлы, оҙон аяҡлы, алһыу ҡауырһынлы һыу ҡошо.

**ФЛАНГ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Ғәскәр сафының, стройҙың, фронттың һул йәки уң яҡ осо. *«Вейхс» армия группаһы Брянск фронтының һул яҡ флангыһында торған совет ғәскәрҙәренә ҡаршы ҡаты һөжүмгә күсте.* Ә. Ихсан. *Мин постамын, Ватан! Фронтыңдың ҡайһы флангыһына ҡуйһаң да, йөрәгеңә атҡан дошман уғын тәнем ҡаплар минең уҙғармаҫ!* Р. Ниғмәти.

**ФЛАНЕ́ЛЬ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Йөнтәҫләнеп торған йомшаҡ йөн йәки кизе мамыҡ туҡыма. // *Фланель кулдәк.*

**ФЛА́НЕЦ** [*рус.* 〈 *нем.*] *и. тех.* Торбаларҙы, резервуарҙарҙы һәм башҡаларҙы тоташтыра торған яҫы ҡуласа йәки болттар ҡуйыу өсөн тишектәр ҡалдырылып эшләнгән диск.

**ФЛЕГМА́ТИК** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Тыныс, вайымһыҙыраҡ, ауыр тәбиғәтле кеше.

**ФЛЕГМАТИ́К** *с.* Холҡонда вайымһыҙлыҡ булған, тыныс, ауыр тәбиғәтле. *Флегматик кеше. Флегматик характер.*

**ФЛЕ́ЙТА** [*рус.* 〈 *ит.*] *и.* Осон киңәйтеп, тишектәрен баҫмаҡлап, ҡурай һымағыраҡ итеп ағастан яһаған тынлы музыка ҡоралы. *Флейта тауышы. Флейта уйнау. Флейтала уйнаусы.*

**ФЛЕ́ЙТАСЫ** *и.* Флейтала уйнаусы. *Флейтасы ҡыҙ.*

**ФЛЕ́КСИЯ** [*рус.* 〈 *лат.*] *и. грам.* Һүҙҙең грамматик яҡтан үҙгәрә торған иң һуңғы өлөшө; ялғау.

♦ **Эске флексия** *лингв.* Һүҙҙең үҙгәреүе нигеҙ эсендәге өндәр үҙгәреүенән ғибәрәт ысул.

**ФЛЕКТИ́В** [*рус.* флективный]: **флектив телдәр** флексия ярҙамында грамматик форма яһай торған телдәр.

**ФЛИ́ГЕЛЬ** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Оло йорттоң ишек алдына йәки урамға төкәтеп һалынған ҙур булмаған өй. *Флигелдә тороу.*

**ФЛОКС** [*рус.* 〈 *гр.*] *и.* Суҡ сәскәле, хуш еҫле баҡса гөлө.

**ФЛО́РА** [*рус.* 〈 *лат.*] *и.* Билдәле бер урынға йәки геологик дәүергә хас үҫемлектәр донъяһы. *Башҡортостан флораһы.*

**ФЛОТ** [*рус.* 〈 *гол.*] *и.* **1.** Бер максатҡа тәғәйенләнгән йәки бер һыуҙа йөрөгән караптар төркөмө. *Хәрби флот. Сауҙа флоты. Йылға флоты. Совет флоты.*

**2.** *хәрби.* Хәрби караптарҙың ҙур берләшмәһе.

**3.** Илдең хәрби диңгеҙ көстәре.

◆ **Һауа флоты** илдең хәрби һауа көстәре һәм граждандар авиацияһы.

**ФЛОТА́ТОР** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* **1.** *тау* Флотация процесында ҡулланыла торған руданың йәки минералдың исеме.

**2.** Флотация буйынса белгес йәки байыҡтырыу фабрикаһындағы эшсе.

**ФЛОТА́ЦИЯ** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* *тау* файҙалы ҡаҙылдыҡты башҡа ҡатышмаларҙан айырып алыу өсөн руданы байыҡтырыу ысулы; был осраҡта ваҡланған ҡаҙылма байлыҡ өҫкә ҡалҡып сыға. *Флотация яһау.*

**ФЛОТИ́ЛИЯ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Берәй һыу бассейнына ҡараған хәрби караптар берләшмәһе. *Балтика флотилияһы. Каспий флотилияһы.*

**2.** Бер нәмәгә тәғәйенләнгән ҡараптар төркөмө. *Балыҡ тотоу флотилияһы. Кит аулау флотилияһы.*

**ФЛОТСЫ** *и.* Хәрби диңгеҙ хеҙмәтендәге кеше.

**ФЛЮ́ГЕР** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Ел йүнәлешен күрһәтеү өсөн мачта йәки башҡа берәй бейек урынға ҡуйылған пластинка, уҡ, флаг һ. б. рәүешендәге әйләнеп тормалы ҡулайлама.

**ФЛЮОРОГРА́ФИЯ** [*рус.* 〈 *лат.*+ *гр.*] *и.* *махс.* Тән ағзаларын рентген нурҙары менән яҡтыртып фотопленкаға төшөрөп алыуҙан ғибәрәт булған кеше һаулығын тикшереү методы.

**ФЛЮС**[1] [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Боҙоҡ теш төбөндә барлыҡҡа килгән эренле шеш.

**ФЛЮС**[2] [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* *тех.* **1.** Рудалағы ҡатышмаларҙың тиҙерәк ирен, шлакка әйләнеүен тәьмин итеү өсөн ҡушылған матдә.

**2.** Паятлағанда, ҡурғаш ялатҡанда металды туттан, майҙан таҙартыу өсөн ҡулланылған матдә.

**3.** Балсыҡтан яһаған нәмәләрҙе яндырғанда ҡулланылған матдә.

**ФЛЯ́ГА** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* **1.** Бер нисә күнәк һыйышлы, ауыҙы ныҡ итеп бикләмәле ике яҡтан тоҡталы һауыт. *Һөт фляғаһы. Һыу фляғаһы.*

**2.** Ғәҙәттә билгә тағып йөрөтөлә торған, шыйыҡлыҡ һалыу өсөн эшләнгән ялпаҡ һауыт. *Һалдат фляғаһы.*

**ФОЙЕ́** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Кино, театрҙа һ. б. тамаша башланғансы йәки тәнәфес ваҡытында тамашасылар көтөп тороу йәки ял итеүгә тәғәйенләнгән бүлмә. *Театр фойеһы.*

**ФОКСТРО́Т** [*рус.* 〈*ингл.*] *и.* Дүрт өлөшлө тактҡа ҡоролоп, ваҡ аҙымдар менән шыма баҫыуға нигеҙләнгән, етеҙ хәрәкәтле парлы бейеү һәм шул бейеүҙең көйө.

**ФО́КУС**[1] [*рус.* 〈*нем.*] *и.* **1.** *физ.* Оптик системанан үткән нурҙарҙың киҫешеү нөктәһе.

**2.** Фотоға төшөргән йәки оптик прибор аша ҡаралған нәмәнең иң асыҡ күренә торған нөктәһе.

**3.** *мат.* Кәкре һыҙыҡтағы нөктәгә ҡарата үҙенсәлеге булған даими нөктә.

**ФО́КУС**[2] [*рус.* 〈*нем.*] *и.* **1.** Төрлө физик закондарҙы, үҙенсәлектәрҙе оҫта файҙаланыу һәм йылғыр, сос хәрәкәттәр нигеҙендә тыуған күҙ бәйләү күренеше, алымы. *Фокус күрһәтеү.*

**2.** *күсм.* *һөйл.* Хәйлә, алым. *[Ҡатын] беҙгә кәңәштәр бирә. Новиков уның кәңәшен тыңламай.— Беҙҙең фокус башҡа төрлө, шуның өсөн үҙебеҙсә эшләйбеҙ,— тип, үҙ эше менән булаша.* Д. Юлтый.

**ФОКУССЫ** *и.* Фокус [2] күрһәтеүсе артист.

**ФОҠАРА** [*гәр.*] *и.* *иҫк.* Ярлы халыҡ. *Буржуазия тәрилкәһен ялап йөрөгән әҙиптәр, мөхәррирҙәр вә монаҡиттар .. синфи көрәште томаларға, әһеле фоҡараның синфи аңын үҫтермәҫкә маташалар.* З. Шәрҡи.

**ФОЛЬГА́** [*рус.* 〈*пол.*] *и.* Нимәнелер төрөү, биҙәү, күҙгә яһау һ. б. эштәр өсөн ҡулланылған ҡағыҙ кеүек бик йоҡа йомшаҡ металл. *Баҡыр фольга. Аҡ ҡурғаш фольгаһы. Фольгаға төрөлгән кәнфит.*

**ФОЛЬКЛО́Р** [*рус.* 〈*ингл.*] *и.* Халыҡ тарафынан ижад ителеп, быуындан-быуынға һөйләнеп килгән төрлө әҫәр (әкиәт, йыр, мәҡәл һ. б.); халыҡ ижады. *Йола фольклоры. Фольклор йыйыу.* ■ *Фольклор борон заманда, беҙҙең бабайҙар китап эшен белмәгән мәлдә, хәҙерге яҙма әҙәбиәт ролен үйнаған.* Ғ. Амантай.

**ФОЛЬКЛОРИ́СТИКА** [*рус.*] *и.* Фольклорҙы өйрәнә торған фән. *Башҡорт фольклористикаһы.*

**ФОЛЬКЛОРСЫ** *и.* Фольклористика буйынса белгес.

**ФОН**[1] [*рус.* 〈*фр.*] *и.* **1.** Һүрәт төшөрөлгән, биҙәк һалынған нигеҙ; ерлек. *Тюктарҙы алып киттеләр. Мин бик ныҡ ҡараным: береһендә ҡыҙыл ерлеккә зәңгәр биҙәктәр төшөрөлгән, икенсеһе аласа, әҙрәс төҫлөрәк, өсөнсөһө зәңгәр фонға ҡыҙыл түңәрәктәр менән биҙәлгән.* С. Агиш.

**2.** Берәй нәмәнең артҡы планындағы күренеш. *Даланың йомшаҡ һәм тигеҙ рельефы фонында улар [тауҙар] бик юғарыға ҡалҡып тора.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 7 октябрь.

**3.** *күсм.* Хәл-ваҡиғаны үҙ эсенә алған тирәйүн. *Ҡайһы берҙә драматургтар ҙа нефтселәр тормошон фон итеп алалар.* Ә. Вәли.

**ФОН**[2] [*рус.* 〈*гр.*] *и.* Тауыш көсөн билдәләү берәмеге.

**ФОНА́РЬ** [*рус.*] *и.* Быяла йәки башҡа үтә күренмәле нәмә менән көпләнгән яҡтыртҡыс прибор. *Ҡул фонары. Урам фонары.* ■ *Урам сатындағы бейек бағана башында фонарь яна.* Х. Мохтар.

◆ **Проекцион фонарь** экранға һүрәт төшөрә торған оптик аппарат.

**ФОНД** [*рус.* 〈*фр.*] *и.* **1.** Хөкүмәт, берәй предприятие ҡарамағындағы билдәле бер маҡсатҡа тәғәйенләнгән аҡса йәки материаль байлыҡ. *Валюта фонды. Эш хаҡы фонды.*

**2.** Ниҙеңдер төп ресурсы, байлығы. *Архив фонды. Библиотека фонды. Торлаҡ фонды.*

**3.** *фин.* Капиталистик илдәрҙә табыш бирә торған ҡиммәтле ҡағыҙҙар.

**4.** Ижад эшмәкәрҙәренә материаль ярҙам күрһәтеү ойошмаһы.

**ФОНЕ́МА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. лингв.* Билдәле бер телдәге йәки диалекттағы һүҙ һәм морфемаларҙың мәғәнәһен айыра торған өн. *Һуҙынҡы фонема.* ■ *Фонемаларҙың билдәле бер тәртиптәге теҙелешенән һүҙ ойоша һәм шул арҡала һүҙ мәғәнә аңлата.* Ж. Кейекбаев.

**ФОНЕТИК** *с.* Фонетикаға мөнәсәбәтле. *Фонетик закондар. Фонетик транскрипция.*

**ФОНЕ́ТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Телдең өндәр төҙөлөшө, өндәр составы. *Башҡорт теленең фонетикаһы.*

**2.** Тел ғилеменең өндәр составын өйрәнә торған бүлеге. *Фонетика һәм фонология башҡорт теленең өндәр системаһын, өндәрҙең үҙгәреш шарттарын өйрәнә.* Ж. Кейекбаев.

**ФОНЕТИ́СТ** [*рус.*] *и.* Фонетика өлкәһендә эшләгән белгес.

**ФОНОГРА́ММА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. махс.* Пластинкаға, магнитофон таҫмаһына һ. б. яҙып алынған музыка йәки телмәр.

**ФОНО́ГРАФ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Тауышты яҙып ала һәм ҡабаттан ишеттерә торған махсус прибор. *Фонографҡа яҙылғанда Йомабай Иҫәнбаев «Буранбай», «Урал», «Ҡара юрға» һәм «Байыҡ» көйҙәрен уйнаған.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 18 ноябрь.

**ФОНОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тел ғилеменең фонемалар системаһын һәм уларға хас айырмалыҡтарҙы өйрәнгән бүлеге. *Фонология буйынса тикшеренеүҙәр.*

**ФОНО́МЕТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Тауыштың көсөн үлсәй торған прибор.

**ФОНОТЕ́КА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Фонограммалар, тауыштар яҙмаһы йыйынтығы, архивы.

**ФОНТА́Н** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Юғары баҫым аҫтында үргә атылып торған һыу. *Бер нисә урындан фонтандар бәрә башлайҙар. Уларҙың .. бер нисә сажендар юғары күтәрелгән һыу таҫмалары .. иҫ киткес матур сигеү сигәләр.* И. Насыри. / Атылған һыу тирәһен матурлаған ҡоролма. *Ҡышҡы һарай, фонтан, баҡсалар, ҡарлы гранит Нева ярында.* М. Хәй. / Юғары баҫым аҫтында скважинанан үргә атылып сыҡҡан нефть йәки газ. *Нефть фонтаны. Газ фонтаны.* ■ *Скважина үкерә. Фонтан шаулап вышка эсендә өйөлөп торған торбаларҙы ҡуҙғатып бер-береһенә һуҡҡылай.* А. Карнай. *Егет ҡулы тейһә, ер майы ла ете ҡаттан ата фонтанын.* Р. Ғарипов. / Ҙур көс менән үргә бәрелгән нәмә. *Беҙҙең землянкалар эргәһендә бер рәттән өс-дүрт бомба ярылды. Улар ҡара тупраҡ фонтандарын һауаға күтәрҙеләр.* Д. Юлтый.

**ФОНТАНЛАУ** *ҡ.* Фонтан булып атылыу. *Еребеҙҙең күкрәгендә иҫәпһеҙ алтын тулы, мәңге фонтанлап торһа ла бөтмәҫлек нефть күле.* С. Ҡудаш.

**ФО́РИНТ** [*рус.* ⟨ *венг.*] *и.* Венгрияның аҡса берәмеге.

**ФО́РМА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Берәй нәмәнең тышҡы күренеше; рәүеш. *Беләҙектәрҙе төрлө формала: ялпаҡ, яҫы, ҡалын, йоҡа .. итеп эшләй башлайҙар, төрлө матур ҡиммәтле таштар менән биҙәйҙәр.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1968, № 9.

**2.** Айырым эш-шөғөл тармағындағы кешеләр өсөн билдәләнгән махсус кейем өлгөһө. *Мәктәп формаһы. Милиция формаһы. Һалдат формаһы.*

**3.** Нимәнеңдер йөкмәткеһе менән тығыҙ бәйләнгән төҙөлөшө, структураһы. *Дәүләт менән идара итеү формаһы. Ойоштороу формаһы.* ■ *Экономикаға етәкселек итеү формаларын һәм ысулдарын камиллаштыра барып, дәүләт хеҙмәт етештереүсәнлеген үҫтерҙе..* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. / *филос.* Йөкмәткенең эске төҙөлөш, булмыш ысулы. *Йөкмәтке менән форма берҙәмлеге.*

**4.** *сәнг., әҙ.* Әҫәрҙең йөкмәткеһен асыу ысулы булып торған әҙәби алымдар системаһы. *[Шағир] яңы йөкмәткене иҫке поэтик формаларға һыйҙырырға тырыша.* Ғ. Хөсәйенов.

**5.** Сирҙең булыу көсөнә бәйле төрө. *Ангинаның көслө формаһы. Грипптың еңел формаһы.*

**6.** Нимәгәлер билдәле бер рәүеш биреү өсөн ҡулланылған махсус ҡулайлама, ҡалып. *Ҡоросто формаға ҡойоу. Кексты формала бешереү.* / Рамға ҡуйылған типография наборы йәки баҫырға әҙерләнгән башҡа төр нәмә (*һүрәт, биҙәк, һыҙыҡ һ. б.*).

**7.** Нимәнеңдер ҡабул ителгән үрнәге. *Протокол яҙыу формаһы.* Нимәнеңдер үтәлешендә мотлаҡ тип ҡаралған тәрип. *Йыйылышты тейешле формала алып барыу.*

**8.** *лингв.* Грамматик категорияны һүҙ менән һөйләмдәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтен тышҡы яҡтан билдәләй торған сара. *Килеш формаһы. Күплек формаһы. Эйәлек формаһы.*

**9.** *мат.* Бөтә быуыны ла бер үк дәрәжәлә торған бер нисә үҙгәрешле һанды эсенә алған күпбыуын.

◆ **Формаһына килтереү** тейешле хәлгә килтереү; шартына килтереү. *[Новиков:] Шулай ҙа ҡыҙҙар эргәһенә баргас, формаһына килтерәйек инде.* Д. Юлтый.

● *Формаң менән маҡтанма, нормаң менән маҡтан.* Әйтем. *Эшлекле норма өсөн йөрөр, эшлекһеҙ форма өсөн йөрөр.* Әйтем.

**ФОРМАЛАУ** *и. ҡар.* **ҡалыплау.**

**ФОРМАЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Нимәгәлер билдәле бер форма биреү. / Кемдеңдер тәбиғәтендә, аңында билдәле һыҙаттар, сифаттар тәрбиәләү. *Кешенең ҡарашын формалаштырыу.*

**2.** Нимәнелер хасил итеү, ойоштороу. *Хәрби часть формалаштырыу.*

**ФОРМАЛАШЫУ** *ҡ.* **1.** Билдәле бер формаға килеү. *Тауҙар формалашып бөткәндән һуң Урал территорияһы ер ҡабығының тыныс районына әйләнгән.* Д. Бураҡаев. / Тамамланған, өлгөргән бер хәлгә килеү. *Яҙыусы булып формалашыу.* ■ *Яңы кешенең формалашыуында, уны тәрбиәләүҙә совет мәктәбе ҙур роль уйнай.* Ғ. Сәйетбатталов.

**2.** Төҙөлөү, ойошоу. *Хәкимйән Әхмәтгәлин билдәләнгән хәрби часть формалашыу осорон кисерә ине.* М. Хәйҙәров.

**ФОРМАЛИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* **1.** Эштең асылына иғтибар итмәй, тышҡы формаһын ғына һаҡлау күренеше, формаль мөнәсәбәт. *Беҙ Искәндәр ағай менән .. формализмдың эшкә күпме зыян итеүе тураһында һөйләшеп ултырҙыҡ.* З. Хисмәтуллин.

**2.** Төрлө фән өлкәһендә тормоштан һәм идея йөкмәткеһенән тотош айырылып, формаға ғына әһәмиәт бирә торған идеалистик йүнәлеш. / Буржуаз сәнғәт һәм әҙәбиәттә форманы йөкмәткенән айырыу, йөкмәткенән өҫтөн ҡуйыу ағымы.

**ФОРМАЛИ́Н** [*рус.*] *и.* Дезинфекцияла шулай уҡ производствола ҡулланыла торған һаҫыҡ, ҡырҡыу еҫле шыйыҡ матдә. *Формалин ҡулланыу.*

**ФОРМАЛИ́СТ** [*рус.*] *и.* **1.** Эштең асылына иғтибар итмәй, формаль ҡараған кеше.

**2.** Формализм (2 мәғ.) яҡлы кеше.

**ФОРМАЛИСТИК** *с.* Формализм (2 мәғ.) принциптарына нигеҙле. *Формалистик сәнғәт.*

**ФОРМАЛЬ** [*рус.* формальный] *с.* **1.** Форма (7 мәғ.) буйынса эшләнгән; рәсми, законлы. *Зал тып-тын ҡалды. Судтың башында була торған һәр төрлө кәрәкле формаль процедураларҙан һуң, гәйепләнеүселәрҙән яуап алыу башланды.* Ғ. Әмири. *Бохара ул сакта (1920 йылда) формаль яҡтан бойондороҡһоҙ дәүләт һаналды.* Л. Ғадилов.

**2.** Эштең асылына иғтибар итмәй, формаһын ғына һаҡлауға ҡоролған. *Формаль яуап. Формаль рәүештә башҡарыу.*

**3.** Формализм (2 мәғ.) идеяларына нигеҙле, формализм менән һуғарылулы.

**4.** *лингв.* Формаға (8 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Һүҙҙең формаль мәғәнәһе.*

**ФОРМА́Т** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* **1.** Китап, ҡағыҙ, фотографик һүрәт һ. б. шуның һымаҡ нәмәнең ҙурлыҡ үлсәме. *Ҙур формат. Бәләкәй формат.* ■ *«Ваҡыт» урынына Ырымбурҙа икенсе большевиктар газетаһы шул уҡ «Ваҡыт» форматында .. сығарыла.* З. Шәрҡи.

**2.** *типогр.* Набор полосаһының, биттәге юлдың оҙонлоғо һәм бейеклеге.

**ФОРМА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** *кит.* Йәмғиәттең тарихи үҫешендәге билдәле бер баҫҡыс, стадия, шулай уҡ ошо үҫеш стадияһына хас булған һәм етештереү ысулдары менән билдәләнгән йәмғиәт төҙөлөшө. *Ижтимаги-экономик формация. Ҡоллоҡ формацияһы. Феодализм формацияһы. Социализм формацияһы.*

**2.** *геол.* Билдәле бер геологик шартта барлыҡҡа килгән тау тоҡомдарының комплексы.

**ФОРМО́ВКА** [*рус.*] *и.* Формаға, ҡалыпҡа ҡойоу эше. *Формовка цехы.*

**ФОРМОВКАЛАУ** *ҡ.* Формаға, ҡалыпҡа ҡойоу. *Формовкалау цехы. Деталде формовкалау.*

**ФОРМО́ВЩИК** [*рус.*] *и.* Формовкала эшләүсе эшсе. *Формовщик булып эшләү.*

**ФО́РМУЛА** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Ниндәйҙер хәлгә, законға, мөнәсәбәткә һ. б. ҡарата бирелгән ҡыҫҡа, тапҡыр билдәләмә. *Был мөхәббәт күптән таныш булған формуланы һаман ҡабатлай: үҙең яратмаған һине һөйә, һин яратҡан — һине яратмай.* Ә. Атнабаев. / Нимәгәлер һүҙ менән бирелгән ҡыҫҡа һәм аныҡ билдәләмә.

**2.** Төрлө дәүмәл, нисбәт һәм составты шартлы тамғалар менән күрһәткән билдәләмә. *Геометрик формула. Математик формула. Химик формула.*

**ФОРМУЛИРО́ВКА** [*рус.*] *и.* **1.** Фекерҙең ҡыҫҡа һәм асыҡ итеп биреләше.

**2.** Фекерҙең һүҙҙәр ярҙамында биреләше.

**ФОРМУЛИРОВКАЛАУ** *ҡ.* Фекерҙе асыҡ итеп әйтеп биреү.

**ФОРМУЛЯ́Р** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* **1.** *махс.* Машина һәм ҡоралдарҙың эшләүен, ремонтта булыуын һ. б. яҙа торған махсус дәфтәр; эш дәфтәре.

**2.** Библиотекалағы китап тураһында төрлө мәғлүмәт яҙылған махсус карточка. *Формуляр тултырыу.* / Библиотека китабы менән файҙаланыусы исеменә төҙөлгән махсус ҡағыҙ.

**ФОРПО́СТ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Ил һаҡлаған ғәскәрҙәрҙең алғы посы, шулай уҡ сик буйындағы нығытылған пункт. *Совет Приморьеһы.. Тыуған илебеҙҙең Тымыҡ океандағы көүәтле форпосы.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 2 апрель. / *күсм. кит.* Нимәнеңдер таянысы, нигеҙе. *Медногорск ҡалаһы Көньяҡ Уралдың иң сигендә тыуып килгән коммунизм форпостарының береһе ул.* К. Мәргән.

**ФОРСАТ** [*ғәр.*] *и.* Ниндәйҙер бер эш өсөн яйы килеп торған уңайлы ваҡыт. *Форсат булыу. Форсат биреү. Форсат табыу.* ■ *Әҙ генә форсат сығыу менән еләк йыйырға китеүҙәр, ағас араһына кереп ҡарағат, муйыл йыйыуҙар бигерәк күңелле ине.* М. Ғафури. *Ниңә килмәй икән сәләм хаты; әллә юҡмы икән форсаты* (Халыҡ йырынан).

● *Ваҡыт — алтын, форсат — алмас, ваҡыт етмәй, форсат булмай.* Мәҡәл.

**ФОРСУ́НКА** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Шыйыҡ яғыулыҡты пар ҡаҙанына, эске яныулы двигателгә һиптерә, бөркөтә торған ҡулайлама. *Мейес газ менән яғыла. Һигеҙ форсунка эшләй.* Р. Низамов.

**ФОРТ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Ҡәлғәне уратып алған ҡойма алдындағы асыҡ йәки ябыҡ нығытма: 18 быуат аҙағынан 20 быуат башына тиклем ҡәлғә ҡоролмаһы системаһындағы оборона тотарлыҡ үҙенә башҡа айырым нығытма. *Боҙ өҫтөнән биш-алты саҡрымлап барғас, Кронштадты солғап алған форттарҙы һаҡлаған һалдаттарҙың ҡараҫҡылары күренә башланы.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**ФО́РТЕ** [*рус.* ⟨*итал.*] *муз.* **1.** *р.* Көслө итеп, яңғыратып (музыкаль әҫәрҙәрҙе башҡарыуға ҡарата); *киреһе* пиано.

**2.** *и.* Музыкаль әҫәрҙең ошо рәүештә башҡарылған урыны һәм ошондай башҡарылыш.

**ФОРТЕПЬЯ́НО** [*рус.* ⟨*ит.*] *и.* Пианино, рояль кеүек баҫмаҡлы, ҡыллы музыка ҡоралының дөйөм исеме. *Фортепьяно тауышы. Фортепьянола уйнау.*

**ФОРТИФИКАЦИОН** [*рус.* фортификационный] *с.* Фортификацияға мөнәсәбәтле. *Фортификацион ҡоролма.*

**ФОРТИФИКА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Оборона ҡоролмалары һәм хәрби нығытмалар төҙөү тураһындағы фән. *Фортификация өйрәнеү.*

**2.** Хәрби нығытмалар ҡороу эше һәм шул нығытмалар.

**ФО́РТОЧКА** [*рус.*] *и.* Бүлмәләге һауаны елләтеү өсөн тәғәйенләнгән тәҙрәләге асмалы күҙгәнәк. *Форточкалы тәҙрә. Форточканы ябыу.* ■ *Тур бүлмәнең форточкаһын барып асыуым*

*булды — йомшак кына кар бөртөгө усыма килеп кунды.* А. Игебаев.

**ФО́РУМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Боронғо Римдә: ҡаланың ижтимағи тормош үҙәге булып хеҙмәт иткән майҙан.

**2.** Мөһим мәсьәлә тикшереүгә арналған ҙур йыйылыш. *Йәштәрҙең Бөтә донъя форумы. Форумға йыйылыу. Форум үткәреү.*

**ФОСГЕ́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Промышленноста төрлө буяу һәм дарыу яһау өсөн файҙаланылған төҫһөҙ газ (беренсе донъя һуғышында ағыулаусы газ рәүешендә ҡулланыла).

**ФОСФА́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ашламалар, өҫтәмә минерал аҙыҡтар һәм йыйыу нәмәләре составына ингән фосфор кислотаһы тоҙо.

**ФО́СФОР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Химик элемент, ҡайһы бер минералдарҙа, тереклек һәм үҫемлек туҡымаларында була торған тиҙ тоҡаныусан, ҡараңғыла яҡтыртыусан матдә. *Ак фосфор. Ҡыҙыл фосфор. Фосфор кислотаһы. Фосфор тоҙо.*

**ФОСФОРЕСЦЕ́НЦИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* *физ.* Ҡайһы бер матдәләрҙең нур тәьҫире туҡтағандан һуң да яҡтырып тороу һәләте.

**ФОСФОРИ́Т** [*рус.*] *и.* Апатит, балсыҡ, карбонат һ. б. матдәләрҙән торған фосфор алыуҙа ҡулланылған ултырма тау тоҡомо. *Һәләүек буйының югары өлөшөндә шактай калын фосфорит катламы ята.* М. Хисмәтов.

**ФОСФОРЛЫ** *с.* Составында фосфор булған, фосфорҙан торған. *Фосфорлы кальций. Фосфорлы ашламалар.*

**ФОТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* *физ.* Есем йөҙөнөң яҡтыртылыу дәрәжәһен үлсәү берәмеге.

**ФО́ТО** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* *кар.* **фотография** 2.

**ФОТОАЛЬБО́М** [*рус.*] *и.* Фотографиялар ҡуйылған альбом.

**ФОТОАППАРА́Т** [*рус.*] *и.* Фотоға төшөрә торған аппарат.

**ФОТОВИТРИ́НА** [*рус.*] *и.* Фотолар ҡуйылған витрина.

**ФОТО́ГРАФ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Профессиональ рәүештә фотография менән шөғөлләнгән кеше. *Фотограф булыу. Фотографка укыу.*

**ФОТОГРАФИК** *с.* **1.** Фотография өсөн тәғәйенләнгән. *Фотографик камера. Фотографик әсбап.*

**2.** Фотографияға мөнәсәбәтле. *Фотографик сәнғәт.*

**3.** Фотография юлы менән эшләнгән. *Фотографик һүрәт. Фотографик репродукция.*

**ФОТОГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Махсус оптик аппарат ярҙамында яҡтылыҡҡа һиҙгер материалға нәмәнең һүрәтен төшөрөү ысулы. *Фотография менән шөгөлләнеү.*

**2.** Шул юл менән төшөрөлгән һүрәт. *Фотографияға төшөү.*

**3.** Шул юл менән һүрәт төшөрә һәм эшләй торған махсус мастерской. *Фотографияға барыу.*

**ФОТОКА́МЕРА** [*рус.*] *и.* **1.** Фотоаппараттың пластинка йәки плёнка ҡуя торған эске өлөшө.

**2.** Фотоаппарат. *Спутникта Ерҙең болотло катламын автоматик рәүештә фотоға төшөрә торған ике камера бар.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 2 март.

**ФОТОКА́РТОЧКА** [*рус.*] *и.* *һөйл.* Фотоаппарат ярҙамында төшөрөлгән һүрәт; карточка. *Фотокарточкаға төшөү.*

**ФОТОКО́ПИЯ** [*рус.*] *и.* Берәй документтың, ҡулъяҙманың һ. б. фотография юлы менән эшләнгән күсермәһе. *Документтың фотокопияһы. Боронғо ҡулъяҙмалар фотокопияһы.*

**ФОТОКОРРЕСПОНДЕ́НТ** [*рус.*] *и.* Газета-журналдар өсөн фотолар эшләгән фотограф. *Фотокорреспондент булып эшләү.*

**ФОТОКҮРГӘҘМӘ** *и.* Фотография юлы менән эшләнгән һүрәттәрҙән торған күргәҙмә. *Фотокүргәҙмә ойоштороу. Фотокүргәҙмәлә катнашыу.*

**ФОТОҠАҒЫҘ** *и.* Фотография төшөрә торған махсус ҡағыҙ.

**ФОТОЛАБОРАТО́РИЯ** [*рус.*] *и.* Яҡтылыҡҡа һиҙгер фотографик материалдар менән эш итә торған лаборатория.

**ФОТО́МЕТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Яҡтылыҡ дәүмәлен билдәләй торған прибор.

**ФОТОМЕТРИК** *с.* Фотометрияға мөнәсәбәтле, фотометрияға нигеҙле. *Фотометрик күҙәтеү. Фотометрик метод.*

**ФОТОМЕ́ТРИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Оптиканың яҡтылыҡ дәүмәлен һәм электромагнит нурҙарының энергетик характеристикаһын үлсәү менән шөғөлләнгән бүлеге.

**ФОТОМЕХА́НИКА** [*рус.*] *и.* *полигр.* Баҫма әйберҙә иллюстрациялар биргәндә фотографик ысул ҡулланыуға нигеҙләнгән саралар йыйылмаһы.

**ФОТОМОНТА́Ж** [*рус.*] *и.* Бер темаға ҡараған бер нисә фотографияны ҡушып йыйнап биреү эше. / Шул юл менән төҙөлгән плакат, реклама, иллюстрация.

**ФОТОМЫЛТЫҠ** *и.* Ирекtә йөрөгән хайуандарҙы фотоға төшөрөү өсөн тәғәйенләнгән мылтыҡ рәүешендәге фотоаппарат.

**ФОТО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Яҡтылыҡ киҫәксәһе, электромагнит ҡыры кванты.

**ФОТОНАБО́Р** [*рус.*] *и.* *полигр.* Диапозитив йәки негатив рәүешендә йыйылған һәм киләһе баҫма формалар өсөн файҙаланылған набор.

**ФОТООБЪЕКТИ́В** [*рус.*] *и.* Фотографик аппараттың объективы.

**ФОТОПЛЁНКА** [*рус.*] *и.* Фотографик аппаратҡа ҡуйып һүрәт төшөрә торған яҡтылыҡҡа һиҙгер пленка.

**ФОТОРЕПОРТА́Ж** [*рус.*] *и.* Фотографиялар ярҙамында төҙөлгән репортаж. *Фоторепортаж биреү.*

**ФОТОРЕПОРТЁР** [*рус.*] *и.* Фоторепортаж менән шөғөлләнгән фотограф. *Фоторепортёр булып эшләү.*

**ФОТОСИ́НТЕЗ** [*рус.*] *и.* *бот.* Йәшел үҫемлектәрҙә, ылымыҡта һәм ҡайһы бер микроорганизмдарҙа яҡтылыҡ тәьҫиренән углекислый газ менән һыуҙың органик берләшмәгә, углеводҡа әйләнеү процесы. *Фотосинтез процесы.*

**ФОТОСТА́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Фотография юлы менән төрлө һыҙмалар, рәсемдәр, документтар күсермәһен ала торған аппарат.

**ФОТОСФЕ́РА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* *астр.* Йондоҙ атмосфераһының яҡтырып торған өҫкө ҡатламы.

**ФОТОТЕ́КА** [*рус.*] *и.* Фотографиялар йәки фотографик негативтар йыйылмаһы, архивы.

**ФОТОТЕЛЕГРА́ММА** [*рус.*] *и.* Фототелеграф ярҙамында бирелгән телеграмма. *Фототелеграмма ебәреү.*

**ФОТОТЕЛЕГРА́Ф** [*рус.*] *и.* Радио йәки телеграф аша һүрәт тапшырыу һәм уны фотокүсермә рәүешендә ҡабул итеүҙән торған бәйләнеш төрө.

**ФОТОТИПИ́Я** [*рус.* ⟨*гр.*] *и. полигр.* **1.** Иллюстрациялар күсермәләрен фотографик пластинкалар ярҙамында баҫып сығарыу ысулы.

**2.** Шул ысул менән баҫылған һүрәт, иллюстрация.

**ФОТОТҮҢӘРӘК** *и.* Фотографияға (1 мәғ.) өйрәнеү түңәрәге. *Фототүңәрәккә яҙылыу. Фототүңәрәккә йөрөү.*

**ФОТОХИ́МИЯ** [*рус.*] *и.* Химияның яҡтылыҡ тәьҫирендә булған реакцияларҙы тикшерә торған бүлеге.

**ФОТОХРО́НИКА** [*рус.*] *и.* Фотографияларҙа сағылған ваҡиғалар хроникаһы.

**ФОТОХӘБӘРСЕ** *и.* Матбуғатта эшләгән фотограф; фотокорреспондент. *Фотохәбәрсе булып эшләү.*

**ФОТОҺӨЙӨҮСЕ** *и. кар.* **фотоһәүәҫкәр.**

**ФОТОҺҮРӘТ** *и.* Фотоаппарат ярҙамында төшөрөлгән һүрәт.

**ФОТОҺӘҮӘҪКӘР** *и.* Фотографияға әүәҫләнгән кеше, фотоһөйөүсе.

**ФОТОЭКСПОЗИ́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Ниндәйҙер бер темаға бағышланып, билдәле бер тәртиптә урынлаштырылған фотоһүрәттәр теҙмәһе. *Фотоэкспозиция төҙөү.*

**ФОТОЭЛЕКТРИК** *с. физ.* Яҡтылыҡ энергияһының туранан-тура электр энергияһына әйләнеүенә бәйләнешле. *Фотоэлектрик метод. Фотоэлектрик эффект.*

**ФОТОЭЛЕКТРО́Н** [*рус.*] *и. физ.* Есем атомының яҡтылыҡ энергияһы тәьҫирендә бүленеп сыҡҡан электрон.

**ФОТОЭЛЕМЕ́НТ** [*рус.*] *и.* Яҡтылыҡ энергияһын электр энергияһына әйләндерә торған прибор.

**ФОТОЭФФЕ́КТ** [*рус.*] *и. физ.* Матдәнең өҫкө йөҙөн яҡтылыҡ нурҙары тәҫирендә тотҡанда атомдарҙан электронды алыу күренеше.

**ФРАГМЕ́НТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. кит.* Ниндәйҙер сәнғәт әҫәренең бер өлөшө, өҙөгө. *Балеттың фрагменты. Һүрәттең фрагменты. Әҫәрҙең фрагменты.* / Ниндәйҙер яҙманың, тексттың бер өлөшө. *Боронғо ҡульяҙма фрагменты.* / Боронғо сәнғәт әҫәренең (архитектура, скульптура) ҡалдығы.

**ФРАГМЕНТА́Р** [*рус.* фрагментарный] *с. кит.* Фрагмент рәүешендәге; фрагментта ғына ҡалған. *Фрагментар әҫәр.*

**ФРА́ЗА** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* **1.** Бер бөтөн фекерҙе аңлатҡан һүҙҙәр теҙмәһе. *Фразалағы һүҙҙәр .. өҙөп-өҙөп айырым рәүештә әйтелмәй.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *муз.* Музыкаль теманың тамамланған бер бәләкәй өлөшө.

**ФРАЗЕОЛОГИ́ЗМ** [*рус.*] *и. лингв.* Дөйөм мәғәнәһе үҙ эсендәге айырым һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә бәйләнмәгән тотороҡло һүҙбәйләне (мәҫ. айыу майы һөртөү, балауыҙ һығыу).

**ФРАЗЕОЛОГИК** *с.* Фразеологияға мөнәс бәтле. *Фразеологик берәмек. Фразеологик һү лек.*

**ФРАЗЕОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Билдәле бе телдәге үҙ аллы мәғәнәгә эйә булған тотоҡл һүҙбәйләнештәр. *Башҡорт теленең фразеологи һы.*

**2.** Тел ғилеменең шул тотороҡло һүҙбәйләнеı тәрҙе өйрәнә торған бүлеге.

**ФРАК** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Алдын сабыуһыҙ ите артына тар ғына ике сабыу ҡуйып тегелг тантаналы осраҡта кейелә торған ирҙәр кейем *Фрак кейеү.*

**ФРАКЦИОН** [*рус.* фракционный] *с.* **1.** Фра ция [1] (1 мәғ.) булып һаналған; фракцияға бә ләнешле. *Фракцион төркөмдәр. Фракцион к рәш.*

**2.** Берәй ойошмаға тарҡаулыҡ килтерә торға фракциялар барлыҡҡа килтергән. *Фракци сығыш.*

**ФРА́КЦИЯ** [1] [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Парламент йә һайланма учреждениеларҙа ниндәйҙер парт ағзаларының берләшкән айырым төркөмө. *Д малағы фракция.*

**2.** Политик партияның дөйөм йүнәлеше мен риза булмай үҙенә башҡа айырылып, парт эсендә көрәш алып барған төркөм. *Фракция тороу.*

**ФРА́КЦИЯ** [2] [*рус.* ⟨*фр.*] *и. махс.* Бөртөк йәки ҡаты есемдәрҙең (ҡом, ваҡланған т тоҡомо һ. б.), шыйыҡ ҡушылманың (мәҫ. неф тең) ниндәйҙер билдәһе (бөртөксәләрҙең ҙурл ғы, тығыҙлығы, ҡайнау температураһы) буйь са айырылған өлөшө. *Нефть фракцияһы. Орл фракцияһы. Фракцияға айырыу.*

**ФРАНК** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Франция, Бельги Швейцария һәм ҡайһы бер башҡа илдәрҙ аҡса берәмеге.

**ФРАНЦУ́З** *и.* Францияның төп халҡын тә кил иткән милләт һәм шул милләттең бер кеше *Француз халҡы. Француз ҡатыны. Франц теле.*

**ФРАНЦУЗСА** *р.* **1.** Француз телендә. *Фр цузса уҡыу. Французса һөйләү.*

**2.** Французларға хас, французлар кеүек.

**ФРА́ТРИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Бер нисә ҡәрҙ ырыуҙы үҙ эсенә алған ҡәбилә эсендәге т көм.

**ФРА́У** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Германияла һ. б. илдә кейәүгә сыҡҡан ҡатын. / Кейәүгә сыҡҡан тынға өндәшеү һүҙе.

**ФРАХТ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и. махс.* **1.** Ғәҙәттә һ юлы менән йөк йәки пассажирҙар йөрөткән өı бирелгән түләү.

**2.** Ошондай түләү менән килтерелгән йөк уны ташыу эше.

**ФРЕГА́Т** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Ҙурлығы буйы линейный караптан ҡала икенсе урында тор өс мачталы елкәнле хәрби карап. / Һыу а кәмәләрен эҙәрләү һәм юҡ итеү өсөн, шулай һауа һәм ракета һөжүменә ҡаршы оборон ҡулланылған карап.

**2.** Тропик диңгеҙҙәрҙә йәшәй торған эре ҡ

**ФРЕ́ЗА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Ағас, металл кеүек нәмәләрҙең өҫтөн эшкәртеү өсөн ҡулланылған күп ҡырлы әйләнмәле киҫкес ҡорал. *Фрезаның .. һәр ҡайһыһы өсөн теүәл үткерләү мөйөшөн билдәләргә инструменттың ҡырҡыусы өлөшөн юғары класс кимәлендә эшкәртергә кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 30 ғинуар.

**2.** Тупраҡ йомшартыу, торф ҡырҡыу һ. б. шундай эштәрҙә ҡулланылған, алдында махсус киҫкесле әйләнмәле барабаны булған машина.

**ФРЕ́ЗЕР** [*рус.*] *и. ҡар.* **фреза** 1. *Фрезерҙың үткер тештәренә нескә генә торбанан һөт һымаҡ шыйыҡса аға. Ул фрезерҙы яныуҙан һаҡлай.* Н. Асанбаев. **Фрезер станогы** фреза (1 мәғ.) ҡуйылған станок.

**ФРЕЗЕРО́ВЩИК** [*рус.*] *и.* Фрезер станогында эшләгән эшсе. *Фрезеровщик булып эшләү.*

**ФРЕЙДИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Кешеләрҙең культура һәм социаль тормошондағы хәлдәрҙе биологик инстинкт көрәшене тип ҡараған Австрия психиатры һәм психологы З. Фрейда тәғлимәте нигеҙендә барлыҡҡа килгән төрлө мәктәп, йүнәлештәр атамаһы.

**ФРЕ́НЧ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Дүрт кеҫә һалып, биллек ҡуйып ғәҙәттә хәрбиҙәр өсөн тегелгән кейем.

**ФРЕО́Н** [*рус.*] *и.* Һыуытҡыс машиналарҙа эшләтеүсе матдә итеп ҡулланылған газ рәүешендәге йәки шыйыҡ хәлдәге продукт.

**ФРЕ́СКА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Еүеш штукатуркаға һыуға иҙелгән буяу менән һүрәт төшөрөү сәнғәте.

**2.** Ошо ысул менән төшөрөлгән һүрәт. *Фреска төшөрөү. Стенаны фреска менән биҙәү.*

**ФРИКАТИВ** [*рус.* фрикативный ⟨ *фр.* ⟨ *лат.*]: **фрикатив өндәр** *лингв.* тыңдың телмәр ағзалары араһындағы тар ектән ышҡылып сығыуы менән яһалған өндәр (в, ф, ҙ, ҫ, з, с, ж, ш, щ, х, һ, й).

**ФРОНТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ғәскәри саф. *Бәләбәй ҡалаһында фронттарга теҙҙеләр; поход алып сығып китеп, йөрәктәрҙе өҙҙөләр* (Бәйеттән) / Хәрби ғәскәр сафының алғы яғы. *Полктар бер нисә сәғәттән фронт менән көнбайышҡа ҡарап оборонаға ятты.* Ә. Ихсан.

**2.** Ғәскәрҙең дошманға ҡаршы торған сафы һәм улар урынлашҡан, биләгән урын. *Фронт буйы. Фронт һыҙығы. Фронтты өҙөү.* ■ *Артта ауыр снарядтар ярылғаны ишетелә. Беҙ фронт тотмайбыҙ, һаман кусәбеҙ ҙә кусәбеҙ.* Д. Юлтый.

**3.** Һуғыш барған стратегик район һәм һуғыш мәлендә хәрәкәттәге армия биләгән урын; яу ҡыры. *Фронт хәлдәре. Фронтҡа ебәреү. Фронтҡа китеү. Фронтҡа оҙатыу. Фронтта йөрөү. Фронттан ҡайтыу.* ■ *Беҙ фронтҡа барып еткәндә, инде ҡыҙыу һуғыштар туҡтаған ине.* Т. Йәнәби. / Ошондай райондарҙың бер участкаһы. *Эшселәр бик нык әҙерләнә. Быҙаулыҡ-Кинель фронтында бер аҙ ғына ҡоралды ярҙам алына.* З. Шәрҡи. / Шул районда урынлашҡан хәрәкәттәге армия һәм ҡоралды көстәр. *Фронт командующийы. Фронт штабы.*

**4.** *күсм.* Бер үк ваҡытта күмәк кеше тарафынан башҡарылырға мөмкин булған эш урыны. *Һәр бер эштә, һәр бер фронтта мин һаман да эшләп йөрөрмөн.* Х. Ҡунаҡбай. / Коллектив эшмәкәрлектең ниндәйҙер бер өлкәһе. *Идеологик фронт. Культура фронты.* ■ *Ҙур илемдең хеҙмәт фронтында ҡулыма тотоп үткер ҡәләмем.., мин мәңгегә поста ҡаламын.* С. Ҡудаш.

**ФРОНТАЛЬ** [*рус.* фронтальный ⟨ *фр.*] *с.* **1.** Дошман фронты буйына ҡаршы йүнәлтелгән. *Фронталь һөжүм.*

**2.** *күсм.* Бер үк ваҡытта бер юлы эшләнелә торған. *Фронталь рәүештә тикшереү.*

**ФРОНТОВИ́К** [*рус.*] *и.* Фронтта ҡатнашҡан, һуғышта булған кеше. *Һуғыш.. еңеү менән тамамланды. Ауылға күп кенә фронтовик әйләнеп ҡайтты.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 7 февраль.

**ФРОНТО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. архит.* Бина фасадының ике яҡлы ҡыйығы менән кәрниз араһындағы өсмөйөш рәүешендәге юғарғы өлөшө, маңлайы.

**ФРОНТТАШ** *и.* Фронтта бергә булған кешеләр. *Фронтташтар менән хатлашыу.* // *Фронтташ иптәш.* ■ *..һәм булды яралы көйө көрәштә сигенгәндәр, фронтташ дуҫ кәберенә йәштәрем түгелгәндәр.* М. Кәрим.

**ФРУКТО́ЗА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. махс.* Емеш-еләктә, сәскә нектарында һәм балда булған емеш шәкәре.

**ФТИЗИА́ТР** [рус.] *и.* Фтизиатрия буйынса белгес, врач. *Фтизиатр булып эшләү.*

**ФТИЗИАТРИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Медицинаның үпкә туберкулезын һәм уны дауалау юлдарын өйрәнә торған бүлеге. *Фтизиатрия кабинеты.*

**ФТОР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Химик элемент, ҡырҡыу еҫле һарғылт төҫтәге газ.

**ФТОРЛЫ** *с.* Составында фтор булған. *Фторлы азот. Фторлы кальций.*

**ФУ** *ымл.* **1.** Нимәгәлер үртәнгәндә, ниҙәндер ерәнгәндә әйтелә. *[Закир:] Фу, шайтан алгыр! Был хәтле лә томра булыр икән.* З. Биишева.

**2.** Арығанда, тамам хәл бөткәндә әйтелә. *Фу, бөгөн бик арыттым.*

**3.** Нимәлер үтәгәндән һуң еңеләйеп ҡалғанды белдергәндә әйтелә. *Фу, өҫтән ҙур йөк төштө.*

**ФУ́ГА** [*рус.* ⟨ *итал.*] *и. муз.* **1.** Бер музыкаль теманың бер нисә тауыш ҡатнашлығында эҙмә-эҙлекле ҡабатланыуы.

**2.** Ошо ҡабатланыуға нигеҙләнгән музыкаль әҫәр. *Бах фугаһы.*

**ФУГАН** [*рус.* фуганок ⟨*нем.*] *и.* Таҡтаны шыма һәм тигеҙ итеп йышыу өсөн тәғәйенләнгән оҙон ҙур йышҡы. *Фуган тотҡаһы.* ■ *[Заһит] таҡтаны фуган менән йыша башланы.* И. Нигмәтуллин.

**ФУГА́С** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Ер йәки һыу аҫтына һалынған шартлатҡыс матдә заряды. *Һуғыш бара, ана бер дворҙа фугас шартлай ерҙе емереп.* Т. Арслан.

**2.** *һөйл. ҡар.* **фугаска.** *Көтмәгәндә йәшен һуҡҡан һымаҡ, гөрҫләп ярылғас та фугас туп, уң яҡ ситтә елгән бер танкыны ялмап ала ялҡын уралтып.* Я. Ҡолмой.

**ФУГА́СКА** [*рус.*] *и.* **1.** *һөйл.* Фугаслы авиабомба.

**2.** Фугаслы снаряд. *Гүзәл ергә фугаскалар яуҙырыуҙы, ҡалалар ауылдарҙы яндырыуҙы .. туҡтатырға!* Р. Нигмәти.

**ФУГАСЛЫ** *с.* Шартлау көсө менән емерә торған. *Фугаслы бомба.*

**ФИКСИН** [*рус.* ⟨*нем.*] *и. хим.* Асыҡ ҡыҙыл төҫтәге синтетик буяу.

**ФУ́КСИЯ** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Баҡсала үҫтерелгән асыҡ ҡыҙыл сәскәле үҫемлек. *Фукция сәскәһе.*

**ФУНДАМЕНТАЛЬ** [*рус.* фундаментальный ⟨*лат.*] *с.* Тәрән йөкмәткеле; нигеҙле. *Фундаменталь әҫәр. Фундаменталь хеҙмәт.*

**ФУНИКУЛЁР** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Текә таулы ерҙә йөктө ҡорос арҡан менән тартып йөрөтөүгә ҡулайлаған юл. *Беҙ фуникулёр тип аталған тау трамвайына ултырып мендек.* Ғ. Ибраһимов.

**ФУНКЦИОНАЛЬ** [*рус.* функциональный ⟨ ⟨*лат.*] *с.* Функцияға (1 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Функциональ анализ. Функциональ мөнәсәбәт.*

**2.** Организмдың эшмәкәрлегенә бәйле.

**ФУ́НКЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Икенсе хәлгә бәйле булып, ул үҙгәргәндә үҙгәргән күренеш.

**2.** *мат.* Икенсе бер үҙгәрешле дәүмәлгә бәйле булып, киммәте уға ярашлы рәүештә үҙгәргән дәүмәл. *Кире тригонометрик функция. Кәсер һыҙыҡлы функция.*

**3.** *биол.* Организмдың йәшәүен, тереклек итеүен күрһәткән эшмәкәрлеге. *Баш мейеһенең функцияһы.*

**4.** *күсм.* Башҡарған эш, вазифа, бурыс. *Социалистик Ватанды һаҡлау дәүләттең иң мөһим функцияларына инә һәм бөтә халыҡтың эше булып тора.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**5.** Үтәгән эш, роль. *Эйә функцияһын үтәү. Эйәлек килеш функцияһы. Акса функцияһы.* ■ *Тап легендалар ярҙамында тарихи йырҙарҙың .. эпиклыҡ функцияһы ҙурайып китә лә инде.* К. Мәргән.

**ФУНТ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и. шул уҡ* **фунт стерлинг.**

◆ **Фунт стерлинг** Великобританияның 100 пенсаға торошло аҡса берәмеге.

**ФУРА́Ж** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Мал-тыуар, ҡош-ҡорт өсөн әҙерләнгән аҙыҡ (бесән, һалам, иген һ. б.). *Фураж әҙерләү.*

◆ **Фураждағы һыйыр** *а. х.* өҫтәмә фураж алған һауын һыйыр.

**ФУРАЖИ́Р** [*рус.*] *и. ҡар.* **фуражсы.**

**ФУРА́ЖКА** [*рус.*] *и.* Тирәсле, козыреклы баш кейеме. *Кун фуражка. Һалдат фуражкаһы. Фуражка кейеү.*

**ФУРАЖСЫ** *и.* Фураж әҙерләгән, фураж менән эш иткән кеше. *Әй, фуражсы кем ул кәҙәре?.. ярамағанмы ни, тотабыҙ ҙа Фәйзулланы ҡуябыҙ.* Р. Ғабдрахманов.

**ФУРГО́Н** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Өҫтө ябыулы арба. *Фургон егеү. Фургонға йөк тейәү.*

**2.** Кузовы ябыулы йөк машинаһы.

**ФУ́РМАН** [*рус.*] *и.* Көлтә, бесән тейәй торған бейек үрәсәле арба. *Бер фурман һалам. Фурманға бесән тейәү.*

**ФУРФУРО́Л** [*рус.* ⟨*лат.*] *и. хим.* Үҫемлек ҡалдыҡтарын гидролизлау юлы менән алынған һәм синтетик ыҫмала, дарыу яһауҙа ҡулланылған һары төҫтәге шыйыҡса.

**ФУРЬЕРИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Утопик социализм тәғлимәтенең бер төрө.

**ФУТ** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* **1.** 30,5 сантиметрға тиң булған оҙонлоҡ үлсәү берәмеге (Англияла һәм метрик система индерелгәнгә тиклем Россияла ҡулланыла).

**2.** *иҫк.* Шул берәмеккә тигеҙ булған линейка.

**ФУТБО́Л** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Уйын ваҡытында һәр команда ҡаршы яҡтағы ҡапҡаға аяҡ менән тибеп туп индереүҙе маҡсат итеп ҡуйған спорт уйыны. *Футбол командаһы. Футбол майҙаны. Футбол тубы. Футбол уйнау.*

**ФУТБО́ЛКА** [*рус.*] *и.* Ғәҙәттә спорт уйынында ҡатнашыусылар кейә торған бәйләм күлдәк.

**ФУТБОЛСЫ** *и.* Футбол уйнаусы. *Футболсылар командаһы.*

**ФУТЛЯ́Р** [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Нимәнелер боҙолоу, ватылыу, бысраныуҙан һ. б. һаҡлау өсөн һала торған ҡумта, көп рәүешендәге әйбер. *Скрипка футляры. Сәғәт футляры. Фотоаппарат футляры. Футлярға һалыу.*

**ФУТУРИ́ЗМ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* 20 быуаттың 10—20 йылдарында Европа сәнғәтендәге бөтә культура мираҫын кире ҡаҡҡан, урбанизмды яҡлаған, заманға ярашлы яңы стиль табып маташҡан йүнәлеш. *Көнбайыш Европалағы футуризм өсөн капиталистик ҡаланы, уның техникаһын баҫып алыу һуғыштарын данлау, хеҙмәтсән халыҡҡа ҡаршы нәфрәт уятырға тырышыу характерлы.* К. Әхмәтйәнов.

**ФУТУРИ́СТ** [*рус.*] *и.* Футуризм яҡлы кеше.

**ФУТУРИСТИК** *с.* Футуризм идеялары менән һуғарылған, футуризмға бәйле. *Футуристик әҫәр. Футуристик шиғыр. Футуристик алым.*

**ФУФ, фуф-фуф** *ымл.* Берәй нәмәнән ерәнгәндә әйтелә. *Дейеү пәрейе ҡайтып инеү менән, фуф-фуф әҙәм еҫе сыға, тип төкөрөнә башлай* (Әкиәттән).

**ФУФА́ЙКА** [*рус.*] *и. ҡар.* **куфайка.**

**ФЫР** *окш.* Ваҡ ҡош ҡапыл осоп киткәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Фыр итеп осоп китеү.*

**ФЫРЛАУ** *ҡ.* Фыр итеү. *Фырлап осоу.* ■ *Күбәләк тик йәм һөйә, тик гөл янында фырлай ул.* Ш. Бабич.

**ФЫРТ** *с.* Матур итеп кейенергә яратҡан, үҙен ҡупшы, эре тотҡан. *Фырт кеше.* // *Фырт кейенеү.* ■ *Бер фырт бисә үтеп бара — танауы тиһәң күккә сөйөлгән. Юҡҡа түгел, мәйтәм, аңлап алам: һуңғы мода менән кейенгән.* Ш. Бикҡол. / Кемдер үҙен һауалы тотҡанда әйтелә. *Фырт ҡыланыу.* ■ *Егет фырт ҡына боролоп, ҡуҡырая биреп, китеп тә барҙы.* Ғ. Байбурин.

**ФЫРТЫМ** *с. ҡар.* **фырт.** *Хисамый артыҡ бай кешеләрҙән булмаһа ла, аттары шәп, фыртым ир ине.* Б. Бикбай.

**ФЫР-ФЫР** *окш.* Ҡабат-ҡабат фыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Фыр-фыр осоу. Фыр-фыр килеү.*

**ФЫРЫЛДАУ** *ҡ.* Фыр-фыр итеү, фыр-фыр килеү. *Күҙгә күренмәгән ҡоштар фырылдап оса.* Н. Мусин.

**ФЫТЫР** *и.*, **фытыр саҙаҡаһы** *дини.* Ураҙанан һуң бирелә торған хәйер, саҙаҡа. *Йәй көнө ине, үҙе ураҙа, фытыр саҙаҡаһы иҫәбенә ҡарт мулла ға арыш урғанда [булды был эш].* С. Ҡудаш.

**ФӘҒАЛИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Эшсәнлек, уңғанлыҡ. *Халыҡтарҙың .. фәғалиәттә айырманы уйлаһаң, хайран ҡалаһың.* Ф. Вәлиев.

**ФӘҒАН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Моң-зар. *Уйнама, сазың, рәнйетмә йәнем, күрмәһен донъя аһ вә фәғаным!* М. Ғафури.

**ФӘЗА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Асыҡ арауыҡ; күк йөҙө. *Мин күрәмен киң фәзаның ай менән йондоҙҙарын.* М. Ғафури.

**ФӘЙЛӘСУФ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Философ. *Инсаниәт тормошонна шиндәй хәлдәр булмаған! Күпме фәйләсуф, мөжәтдиттәр уларға килмәгән!* Х. Ғәбитов.

**ФӘЙРҮЗӘ** [*фарс.*] *и.* **1.** *кар.* **фирүзә.** *Көмөш кенә йөҙөк фәйрүзә ҡаш төшөп кенә китте даръяға* (Халыҡ йырынан).

**2.** [*баш хәреф менән*] Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ФӘЙТҮН** *и. һөйл.* Фаэтон. *Кискә табан Хәйбрахман байҙың ҡапҡаһынан фәйтүнгә егелгән пар ерән ат сыкты.* Д. Юлтый.

**ФӘҠИР** [*ғәр.*] *с.* Мохтажлыҡта йәшәгән, ярлы; *кирәһе* бай. *Фәҡир кеше. Фәҡир булыу.* // *Фәҡир йәшәү.* ■ *Михнәт сигеп малдар таба беҙҙең кеүек фәҡир ир* (Халыҡ йырынан). *Ул саҡта үтә фәҡир йәшәй инек, емерек өй ҙә һүтек аласыҡ.* Я. Ҡолмой. / *и. мәғ.* Ярлы кеше. *Батша, байҙар бейек таш йорттарҙа майға күмелеп гүмер һөргәндәр, ә фәҡирҙәр бөгөлөп, гәмгә күмелеп, ҡайнар йәштәр түгеп йөрөгәндәр.* Б. Вәлит.

♦ **Мин фәҡир** *йәки* **фәҡирегеҙ** түбәнселек менән һөйләгәндә «мин» тигәнде белдерә. *[Сабир мулла:] Мәғлүм булһын ки, беҙ фәҡирегеҙ бик ауыр хәлдәргә ҡалдыҡ.* Б. Ишемғол. *Мин фәҡир Тажетдин атам Ялсыголдо ун дүрт йыл көттөм.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

● *Байҙың татлы ашы — фәҡирҙең ҡанлы йәше.* Әйтем.

**ФӘҠИРЛЕК** *и.* **1.** Ауыр тормош, мохтажсылыҡ. *Фәҡирлектә йәшәү. Фәҡирлектән сығыу.* ■ *Ҡайһылары фәҡирлектән михнәт сигә, ҡайһылары михнәт күрә йыйған малдан.* М. Ғафури.

**2.** Фәҡир булыу хәле. *Йорттоң фәҡирлеге.*

● *Байлыҡ — бер айлыҡ, фәҡирлек — мәңгелек.* Мәҡәл.

**ФӘҠИРЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Фәҡиргә әйләндереү, фәҡир итеү.

**ФӘҠИРЛӘНЕҮ** *к.* Фәҡиргә әйләндереү, фәҡир итеү.

**ФӘҠИРЛӘНЕҮ** *к.* Фәҡиргә әйләнеү, фәҡир, ярлы булыу. *Ваҡыт уҙған һайын халыҡтың тормошо насарлана барҙы, халыҡ фәҡирләнде.* Һ. Дәүләтшина.

**ФӘҠИРСЕЛЕК** *и.* Фәҡир тормош, фәҡирлек.

**ФӘҠИР-ФОҠАРА** *и. йыйн.* Ярлылар, ярлы-ябаға. *Ауыл халҡы икегә бүленгән. Бер яҡта — байҙар, муллалар, уларҙың ҡуштандары; икенсе яҡта — фәҡир-фоҡара, юҡһылдар.* И. Ғиззәтуллин.

**ФӘҠР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Фәҡирлек, ярлылыҡ. *Ошо дүрт нәмәне күрһәтмә беҙгә донъяла, йә рабби: береһе фәҡр, береһе дәин, береһе мараз, береһе зиндан* (Бәйеттән).

**ФӘҠӘТ** [*ғәр.*] *киҫ.* **1.** Һүҙ йәки һөйләмде айырып сикләү өсөн ҡулланыла; тик. *Әхмәт йөрәгенән кешелекте тапкан фәҡәт Гөлнур күңеле.* Ғ. Сәләм. *Теге мәлгүн көстәр, алтын таждар фәҡәт ҡарағандар үҙ яйын.* Д. Юлтый. *Атом энергияһы фәҡәт тыныслыҡҡа ғына хеҙмәт итергә тейеш.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 16 ғинуар.

**2.** *терк. мәғ.* Мәғәнә яғынан киреһен белдергән, ҡаршы ҡуйылған һүҙ йәки һөйләмде теркәү өсөн ҡулланыла; тик. *Уның атай, минең әсәй үлгән, ҡайғылар бер, фәҡәт төҫ башҡа.* Х. Ҡунаҡбай.

**ФӘЛЛӘХ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Игенсе.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ФӘЛСӘФИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Философияға (1 мәғ.) мөнәсәбәтле; философик. *Фәлсәфи фекер.* ■ *[Индрил] паровоздарҙың көсөн айырым бер дәрт менән тасуир итергә, шуға фәлсәфи төҫ бирергә ярата.* Д. Юлтый. *Хәҙерге поэзия тормоштоң айышын, мәғәнәһен асып бирә, фәлсәфи дөйөмләштереү яһай.* Й. Гәрәй.

**2.** Донъяға ҡараш концепцияларын сағылдырған тәрән фекерле; философик. *Фәлсәфи шиғыр.*

**ФӘЛСӘФӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Тәбиғәт, йәмғиәт һәм фекер үҫешенең дөйөм ҡанундары траһындағы фән; философия. *[Томинконың] яңы фекерҙәре, .. хәл ителә алмаған күп мәсьәләләргә асыҡлыҡ бирҙе. Индрилдең фәлсәфәләре реаль төҫкә инә башланылар.* Д. Юлтый.

**2.** Берәй кешенең, ғалимдың донъяға ҡарашы, донъя тураһындағы тәғлимәте; философия. / *һөйл.* Кемдеңдер нимәлер хаҡындағы ныҡлы фекере. *[Кәли — Гәүһәргә:] Мужиктың үҙ фәлсәфәһе бар: «Ҡумәктекен эт еймәҫ!», ти ул.* И. Ғиззәтуллин.

**3.** *һөйл.* Буш һүҙ, сафсата. *Фәлсәфәнән түйҙыҡ инде, һатма, ташла фәлсәфәң. Фәлсәфә сәйнәр заман уҙған, хәҙер эшләр заман.* Ш. Бабич.

♦ **Фәлсәфә һатыу** 1) уйлау, фекер йөрөтөү. *Һыуҙы ни уны матур һауытҡа һалдың ни ҙә насар һауытҡа һалдың ни..— тип үҙенсә фәлсәфә һатҡан [Өйрәнсек].* З. Биишева; 2) кәрәкмәгән буш һүҙ һөйләү.

**ФӘЛСӘФӘИ** [*ғәр.*] *с. кар.* **фәлсәфи.** *Һуңғы йылдырҙа [Б. Бикбай] йәшәү һәм уның фәлсәфәи йөкмәткеһе хаҡында бик күп шиғыр яҙҙы.* Ә. Вахитов.

**ФӘЛӘ** *с.* Буш, юҡ булған. *Ер ҙә юҡ һәм мир ҙа юҡ, хөрлөк тә юҡ — бары ла фәлә.* С. Ҡудаш. / *һөйл.* Һис бер ауырлығы юҡ, ҡыйын түгел, еңел тигән мәғәнәлә әйтелә. *Был эште эшләүе фәлә.* ■ *Мал ҡайғылары фәлә түгел, баш ҡайғылары күберәк* (Халыҡ йырынан).

**ФӘЛӘК** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Күк йөҙө, күк көмбәҙе. *Сулпан ҡалҡты, янды әшкәрә .. ян шулай мәңге, ҡыҙарт фәләкте.* И. Насыри.

**2.** *күсм.* Яҙмыш, тәҡдир. *Һәр аҙымда фәләк кәһәрләне, аҡ бәхеттән мине көнләне.* Д. Юлтый.

**ФӘЛӘКӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Бәлә, ҡаза. *Филасыл эшебеҙ даим һәләкәт, башыбыҙға килә төрлө фәләкәт.* С. Яҡшығолов.

**ФӘЛӘН** [*ғәр.*] *а.* Исемен атамай ғына, кем йәки нимәгәләр ишаралап, «шул, шундай»тигән мәғәнәлә ҡулланыла. *Фәлән кеше. Фәлән ауылда. Фәлән ваҡытта.* ■ *Сер итеп кенә әйтәм,—*

*ти,— Ҡолағыңа һала ҡуй, фәлән төндә, төгән ерҙә немецтар типтерә түй.* М. Кәрим.

● *Фәлән ерҙә алтын бар, барһаң баҡыр табылмаҫ.* Мәҡәл.

-**ФӘЛӘН** [*ғәр.*] *киҫ.* Тулы мәғәнәле һүҙгә ҡушылып билдәһеҙлек мәғәнәһе бирә: -маҙар. *Кеше-фәлән. Килһә-фәлән.* ■ *Ауылда ут-фәлән сыҡмаһа ярар ине.* Һ. Дәүләтшина.

**ФӘЛӘНСӘ** *р.* Нәмәнең атап әйтелмәгән күләмен белдерә. *Фәләнсә йыл. Фәләнсә йәш.* ■ *Иптәш Сынбулатов, ҡыҙыл ылау менән фәләнсә йөк иген оҙаттыҡ, тип маҡтанды.* М. Тажи.

**ФӘЛӘН-ТӨГӘН, фәлән дә төгән** *билдһ. а.* Нимәнелер теҙеп һанап китеү йәки кеше һүҙен тотош ҡабатлау урынына ҡыҫҡартып әйткәндә ҡулланыла. *«Мин дә ирһеҙ ҡалмам әле, әйҙә, бай ҡыҙҙарын ал, фәлән-төгән»,— тип, донъяланың ҡалдырмай теҙеп алып китте Зөләйхә.* Т. Йәнәби.

**ФӘЛӘН-ФӘСМӘТӘН, фәлән дә фәсмәтән** *билдһ. а. ҡар.* **фәлән-төгән.** *Имеш, .. мужикка һуғыш кәрәкмәй, ер булһа, еткән, фәлән-фәсмәтән.* Б. Бикбай.

**ФӘЛӘНӘ** *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың атап әйтелмәгән исеме урынына ҡулланыла. *Бер көн суфый ҡатынына: «Эй, фәләнә, мин һине изге тауға барып йәмин иттермәйенсә паклығыңа ышанмайым»,— тине (Әкиәттән).*

**ФӘН** [*ғәр.*] *и.* **1.** Тәбиғәт йәки йәмғиәттең үҫешендәге законлылыҡты һәм тирә-йүнгә тәьҫир итеү сараларын асып бирә торған белем системаһы; ғилем. *Йәмғиәттең ихтыяждарына ярашлы рәүештә дәүләт фәнде планлы үҫтереүҙе һәм ғилми кадрҙар әҙерләүҙе тәьмин итә.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984. / Шул ғилемдең бер тармағы. *Филология фәндәре. Астрономия фәне.* / Шул тармаҡтағы эш өлкәһе. *Фән менән шөғөлләнеү. Фәнгә бирелеү.* **Фән эйәһе** фән менән шөғөлләнгән белемле кеше; ғалим.

**2.** Мәктәптә, уҡыу йортонда уҡытылған айырым белем тармағы.

**ФӘНА** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һәләкәт.

□ **Фәна булыу** һәләк булыу, юҡҡа сығыу. *Ел илә йығылды ағас һәм фәна булды руан.* С. Яҡшығолов.

**ФӘННИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Фәнгә (1 мәғ.) бәйләнешле; ғилми. *Фәнни проблема.* / Ниндәйҙер проблеманы тикшереүгә бәйле. *Фәнни асыш. Фәнни учреждение.*

**2.** Фән талаптарына ярашлы. *Хужалыҡты фәнни нигеҙҙә алып барыу.*

**ФӘННИ-АТЕИСТИК** *с.* Атеистик фәндәр өлкәһенә бәйле, атеистик фәндәр өлкәһенә ҡараған. *Фәнни-атеистик лекция.*

**ФӘННИЛЕК** *и.* Фәнни булыу сифаты. *Дәлилдәрҙең фәннилеге.*

**ФӘННИ-ПОПУЛЯР** *с.* Фән һәм техника өлкәһендәге ҡаҙаныштарҙы ябай һәм аныҡ итеп аңлатып биреүгә ҡоролған. *Фәнни-популяр әҙәбиәт.*

**ФӘННИ-ТЕХНИК** *с.* Техникаға бәйле фәндәргә ҡарата. *Фәнни-техник әҙәбиәт.*

**ФӘРАУАН** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Бай, етеш тормошло. *Рәхәтлеккә үтептер нисә дәүран, ере киң һәм мәғишәттәре фәрауан.* С. Яҡшығолов.

**ФӘРЕШТӘ** [*фарс.*] *и.* **1.** Дини ҡараш буйынса, алланың вәкиле (ҡартаймай, үлмәй торған ҡанатлы йән эйәһе).

**2.** *күсм.* Саф күңелле, керһеҙ кешегә ҡарата әйтелә.

**3.** *әйл. ф.* **фәрештәм.** Ҡатын-ҡыҙға иркәләп әйтелә. *Зәңгәр күҙҙәренән шиғыр һибеп, көләп тора минең фәрештәм.* Ш. Бабич.

◆ **Фәрештәнең амин тигән сағына** (*йәки сәғәтенә*) **тура килһен** ниҙендер тормошҡа ашыуын теләгәндә әйтелә. *[Әбей:] Эйе шул, Зыя, фәрештәнең амин тигән сәғәтенә тура килеп, сәсегеҙ сәскә бәйләнеп тә ҡуйыр әле.* М. Тажи. **Фәрештә ҡанатлы** бер гонаһһыҙ, саф. *Фәрештә ҡанатлы кеше.*

**ФӘРЗӘНД** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ир бала, ир, сабый. *Йылдар үтер балаларыбыҙҙың балалары [булыр], уларҙың тағы фәрзәндтәре тыуыр.* Ә. Хәкимов.

**2.** Нәҫел.

**ФӘРИ** [*фәр.*] *с.* Тиңдәше булмаған, таң ҡалырлыҡ, ғәжәп. *Фәри заттар кисен айға баҫып, наҙлыҡайым менән күрешкән.* Ш. Бабич.

**ФӘРРАШ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Өй йыйыштырыусы, йорт ҡараусы. *[Нурый бабай] күп йылдарҙан бирле Әстрхандың ҙур мәсеттәренең береһендә фәрраш булып торғанлығы хаҡында һөйләне.* Ғ. Ибраһимов.

**ФӘРУАН** [*фарс.*] *и. ҡар.* **фәрауан.**

**ФӘРШ** [*фәр.*] *и. иҫк.* Хеҙмәтсе, ҡол.

**ФӘРЬЯД** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Ярҙам һорап ҡысҡырған тауыш. *Сыҡты ут, баҫты төтөн, фәрьяд вә зарҙар күккә аша.* Х. Ғәбитов.

**ФӘРӘСӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Зирәклек, отҡорлоҡ.

**ФӘРӘСӘТЛЕ** *с. иҫк. кит.* Зирәк, отҡор. *Һүҙ күҙғатыр ул ир аҫылы тәрән ерҙән, хоҙайым фәрәсәтле йөрәк биргән.* Аҡмулла.

**ФӘС** [*төрөк.*] *и.* Бейек таҡыя рәүешендәге суҡлы ирҙәр баш кейеме (Төркиәлә, Төньяҡ Африкала һәм ҡайһы бер Азия илдәрендә кейәләр). *Хан башынан фәсен һалыу менән, күргән Талип уның оронһон.* Б. Вәлит.

**ФӘСАД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Боҙоҡлоҡ, аҙғынлыҡ, насарлыҡ. *Инсафтан бер мыҫҡал юк эшебеҙҙә, кенә, хәсәд, фәсад тулған эсебеҙҙә.* Аҡмуллла.

**ФӘСЕҮ** *к. һөйл.* Арттырып, ҡабартып һөйләү. *[Хәбибуллин:] Эйе район ғына түгел, бөтә республика беҙгә ҡарап тора. [Йәмғи:] Быныһын, иптәш вәкил, фәстең.* Х. Ғиләжев.

**ФӘСИХ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Матур, оҫта итеп һөйләүсе.

**2.** Әҙәби (телгә ҡарата). *Китап фәсих телдә яҙылған.*

**ФӘСТЕРЕҮ** *к. һөйл.* Арттырып, ҡабартып һөйләү. *Берәр кеше алдаша башлаһа, был яктарҙа: «Нимә һин Ҡуштирәк купецы кеүек фәстерәһең» — тигән һүҙҙәрҙе хәҙер ҙә ишетергә мөмкин.* Д. Исламов.

**ФӘТҮӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк.* Ниндәйҙер эштең шәриғәт буйынса дөрөҫмө-түгелме икәнлеге тураһында дин әһелдәре тарафынан аңлатып бирелә торған рәсми рөхсәт. *Фәтүә алыу. Фәтүә*

*биреү.* ■ *[Ҡорҙашым] Яппар муллаға керҙе, күрәһең, кәңәш йә фәтүә һорамаҡсы бахырың.* Ғ. Әмири.

**2.** Файҙа, мәғәнә. *Һарай һалдырыуҙан ни фәтүә, мал аҫырарға ярамағас.* Я. Вәлиев.

**ФӘТХӘ** [*ғәр.*] *и.* Ғәрәп орфографияһында: тартынҡы өн өҫтөнә ҡуйылған ҡыҫҡа «а» өнөн белдергән диакритик билдә.

**ФӘҮҠЫЛҒАДӘ** [*ғәр.*] *с. иҫк, кит.* Ғәҙәттән тыш. булған. *Башҡорттарҙың фәүҡылғадә ғәйрәттәренә бөтә ҡыҙыл Питер әшселәре шау килә.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**ФӘХЕР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ғорурлыҡ, намыҫ, дан, почет. *Фәхриҙең фәхре түгел яҙмышы менән мөнтабиҡ.* Ш. Бабич.

**ФӘХЕШ** [*ғәр.*] *и.* Боҙоҡлоҡ, уйнаш. *Фәхеш юлына баҫыу. // Фәхеш кеше.*

**ФӘХЕШЛЕК** *и.* Боҙоҡлоҡ, уйнаш; фәхеш. *Фәхешлек ҡылыу.*

**ФӘХЕШХАНА** [*ғәр* + фарс.] *и. иҫк.* Фәхишәләр йорто.

**ФӘХИШӘ** [*ғәр.*] *и.* Юлдан яҙған, боҙоҡ ҡатын; уйнашсы. *Ныязгол суфый булып, хәҙрәткә мөрит булып йөрөй, ә калала һин уны күрһәң ине, араҡы эсеп фәхишәләрҙән ҡайтмай.* Һ. Дәүләтшина.

**ФӘХРИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Маҡтаулы, хөрмәтле. *[Хөсәйенов:] Мин һәм мәҙрәсәбеҙҙең мөдире ғали йәнәп Ғәлим хәҙрәт ошо йәмғиәттең фәхри ағзалары.* С. Агиш.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ФӘХШӘТ** [*ғәр.*] *и.* Һәр төрлө бысраҡ эш, боҙоҡлоҡ. *Юл бирмәмен фәхшәт, вәхшәткә, күкрәк киреп каршы торормон.* Т. Йәнәби.

**ФӘҺЕМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Өлгө булырлыҡ нәмә; үрнәк. *Әҙәм минән фәһем алһын тиеп һайрайһыңдыр инде, күрәһең [һандуғас].* Р. Ғарипов.

**2.** Аҡыл алырлыҡ нәмә; һабаҡ. *Үткәнгә ҡарап фәһем алырға тейеш кеше.* Ә. Вахитов.

**ФӘҺЕМЛЕ** *с.* Аҡыл һәм һабаҡ алырлыҡ. *Фәһемле һүҙ. Фәһемле әкиәт.*

**ФӘҺЕМЛӘҮ** к. Аңлау, төшөнөү. *Һәр нәмәне үҙ ерлегенә бәйләп .. ҡарарға күнеккән крәҫтиән Ленин һүҙҙәренең айышын да ана шулай үҙ тормошона ҡайтарып төҫмөрләй. Уға шулай асығыраҡ, фәһемләү еңелерәк.* Ф. Иҫәнғолов.

**ФЮЗЕЛЯЖ** [*рус.*] *и. авиа* Самолёттың экипажы, пассажирҙар, һәр төрлө йыһаз һәм йөк урынлашҡан корпусы.

# Х

**Х** [ха] Башҡорт алфавитының утыҙынсы хәрефе.

**ХАБ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Йоҡо. **Хабы ғәфләт** иҫ белмәгән ҡаты йоҡо; ғәфләт йоҡоһо. *Хабы ғәфләттән күҙемде асманым төндә тороп.* Һ. Салихов.

**ХАДИМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Байға ялланып эшләгән кеше; ялсы, хеҙмәтсе. *Килеп инеүҙәре менән ресторан хужаһы хадимына баш менән ымланы.* И. Насыри.

**2.** *күсм.* Кемгәләр хеҙмәт иткән, уның мәнфәғәтен яҡлаған кеше. *[Шәмсетдин:] Ҡоро прошение ебәреү генә етмәй, Мифтахетдин, милләт хадимдарының тауышы кәрәк бында.* К. Мәргән.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ХАДИМЛЫҠ** *и. иҫк. кит.* **1.** Ялсылыҡ, хеҙмәтселек. *Хадимлыҡҡа алыу. Хадимлыҡта ғүмер үткәреү.*

**2.** *күсм.* Хадим (2 мәғ.) булыу хәле. *Милләткә хадимлыҡ итеү. Дингә хадимлыҡ итеү.*

**ХАДИМӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Хеҙмәтсе ҡатынҡыҙ.

**ХАДИҪ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* хадиҫә.

**ХАДИҪӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Булған хәл, ваҡиға.

**2.** Тәбиғәт күренеше.— *Йәшен йәшнәү, күк күкрәү, ямғыр яуыу кеүек тәбиғи хадиҫәләр һеҙгә билдәле.* С. Агиш.

**ХАЖ** [*ғәр.*] *и.* Ғибәҙәт ҡылыр өсөн Мәккә ҡалаһына барған сәфәр. *[Әбделғәлим — Муллағәлегә:] Улым, тирә-яҡта хажға барырға йыйыналар икән. Мин дә шунда — Мәккә, Мәҙинә тарафына — сәфәр сыҡмаҡ иттем әле.* Ф. Иҫәнғолов.

□ **Хаж ҡылыу** Мәккәгә барып, изге урындарҙа ғибәҙәт ҡылыу, *[Морат:] Солтангәрәй атың бар. .. Мәккәлә лә булғанһың, унда хаж да ҡылғанһың, пәйғәмбәрҙең юлынан ҡәғбәгә лә барғанһың.* М. Буранғолов.

♦ **Хаж ҡынаһы** үтә күренеп торған һабаҡлы, ваҡ йылтыр япраҡлы, ал сәскәле ҡышлау гөлө; ҡышлау ҡынаһы.

**ХАЖИ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Мәккәгә барып, хаж ҡылып ҡайтыусыға бирелгән исем һәм шул исемде йөрөткән кеше. *Хажи булыу.* ■ *[Хажиҙан] Һеҙ Төркиәлә булғанһығыҙ, Дарданелл боғаҙын күрҙегеҙме? — тип һорағандар. Хажи быға яуап итеп: — Күрҙек, пароходта бергә сәй эсеп барҙыҡ .. тигән.* С. Агиш.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

● *Мәккәгә барыу менән ишәк хажи булмаҫ.* Әйтем.

**ХАЗАР** *и.* Көнсығыш Европаға 4 быуатта һундарҙан һуң килгән һәм Көнбайыш Каспий буйы далаларында күсеп йөрөгән төрки телле халыҡ (7 быуат уртаһында Хазар ҡағанатын ойошторалар). *Хазар халҡы. Хазар теле.*

**ХАЗИНА** [*ғәр.*] *и.* **1.** Йыйылған, тупланған төрлө баһалы нәмә; байлыҡ. *Ҡул һалыр ул [дошман] илемә, бар милкемә, хазинамды туҙҙырыр ел иркенә.* М. Харис.

**2.** Ер аҫтындағы төрлө тәбиғи байлыҡ; мәғдән. *Башҡортостан — ер аҫты хазиналарына бай ил.* М. Хисмәтов. *Ер аҫтым — хазина, тауҙарым бейек, торалар күкһел болотҡа тейеп.* М. Хәй.

**3.** *күсм.* Һәр төрлө культура һәм рухи байлыҡтар. *Белем хазинаһы. Сәнғәт хазинаһы. Тел хазинаһы.* ■ *Донъя классикаһына үҙенсәлекле хазина булып өҫтәлерҙәй «Урал батыр» эпосын яҙып алыуы, уны киләсәк быуындарға тапшырыу өсөн ҙур эштәр атҡарыуы менән генә лә Мөхәмәтша Буранғолов ил хөрмәтен ҡаҙанырға хаҡлы.* «Ағиҙел», 1968, № 12.

**4.** Йыйып, йәшереп, күмеп ҡуйылған аҫыл заттар. *Хазина эҙләү. Хазина табыу.* ■

*[Йәмил:] — Яҙ булғас та Оксана, мин һиңә бер һарай хазина бүләк итәм,— тигән.* М. Кәрим.

♦ **Үҙе** (*йәки* **торғаны) бер хазина** бик һөнәрле, бик кәрәк кешегә ҡарата әйтелә.

● *Хазина таптым — сүпкә аттым, алтын таптым — бушҡа һаттым.* Әйтем.

**ХАЗИНАДАР** [*ғәр.*+*фарс.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Һәр төрлө байлыҡ эйәһе.

**2.** *иҫк.* Хазинасы.

**ХАЗИНАСЫ** *иҫк. и.* Берәй ойошманың аҡсаһын һаҡлап, шул аҡсаны алып-бирен торған кеше. *Хазинасы булып эшләү. Колхоз хазинасыһы.*

**ХАЗИР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ҡайҙалыр бер ерҙә булған, күҙ алдындағы. *Хазир булыу.* ■ *Һин бер һурәт, надир һин, кис кашымда хазир һин, уяна килһәм, янда юк, ни хәсрәтле миҙә һин?* «Буҙйегет».

**ХАИН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Хыянат эшләгән кеше; хыянатсы, һатлыҡ йән. *Илем исемен быҫратыусы йәшерен дошман — хаиндарға нәфрәт яна.* Ә. Шакир. *Сеу! Хаин булырһың, ант итмә, иҫәр!* Ш. Бабич. *Затынан ер ерәнгән, атынан ил ерәнгән хаин тигән йолкош бар* (Ҡобайырҙан). / *с. мәғ.* Вәғәҙәһен боҙған, хыянат иткән. *Хаин йән.* ■ *Әйҙә, һөйөн, башҡорт, әйҙә шатлан! Ҡырылып бөтһөн хаин бәндәләр.* Х. Ғәбитов.

**ХАИНЛЫҠ** *и. иҫк. кит.* Хыянатлыҡ. *Хаинлыҡ ҡылыу.*

**ХАИФ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ҡурҡаҡ. *Мулла булһа, хаиф улып, зарлы булһын.* Аҡмулла.

**ХАЙРАН** [*ғәр.*] *с.* **1.** Аптырарлыҡ, таң ҡалырлыҡ; ғәжәп. *Хайран заман. Хайран кеше.* ■ *Шатланалар, байрам, тиҙәр, барлыҡ донъя хайран, тиҙәр.* С. Ҡудаш. *Бар ине арзан заман, сәйран заман, хайран заман.* Ш. Бабич. // *Күҙҙәреңдең бер балкышын күреп, мин хайрандың күҙе ҡамашты.* М. Кәрим.

**2.** *р. мәғ.* Бик, сикһеҙ. *Хайран аҡыллы. Хайран матур. Хайран тәртипле кеше.*

□ **Хайранға ҡалыу** ныҡ аптырау; ғәжәпкә ҡалыу. *Хыялый ғашиҡ һымаҡ хайран ҡалдым .. көмөш һырғаһыҙ һәм толомһоҙ йөҙө яҙға оҡшаш һылыуға.* С. Кулибай.

**ХАЙРАН-ВАЙРАН: хайран-вайран булыу** ҡыйралыу, һәләк булыу. *Ошо көнгәсә кәзә кимереп бөтөргән ялангас емеш-еләк ҡыуаҡтары һерәйеп ултырған әллә күпме гектар ерҙәр хайран-вайран булып ята бирҙе.* Ф. Рәхимғолова.

**ХАЙРАНЛАНЫУ** *ҡ. диал.* Ғәжәпләнеү.

**ХАЙУАН** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ер йөҙөндә йәшәгән йән эйәләре (кеше, ҡош-ҡорт, бөжәктән башҡаһы). *Ер-һыу хайуандары. Йорт хайуандары. Ҡырағай хайуандар. Тояҡлы хайуандар. Умыртҡалы хайуандар. Хайуандар донъяһы.* ■ *Хайуандарҙы көрләндер, үләндәрҙе төрләндер, донъя йөҙөн нурландыр, яу, яу, ямғыр, яу ямғыр.* Ш. Бабич. *Был афәттән бар халыҡтың ҡото осҡан, йәйләүҙәге бөтә хайуан ҡурҡып ҡасҡан* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**2.** *ҡусм.* Тәрбиәһеҙ, наҙан, тупаҫ кешегә ҡарата әйтелә. *Ҡайныһы хайуан көйө ғамдар ҡашында шәп була.* Ш. Бабич. / Әрләгәндә әйтелә. *— Кем рөхсәте?.. Ял итәһең.., хайуан. Баҫ, эшлә!* Ғ. Хәйри.

**ХАЙУАНАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Хайуандар. *Ваҡ хайуанат.* ■ *Был аңдан һәр халыҡтың ҡото осҡан, өйҙә-төйҙә хайуанат ҡурҡып ҡасҡан.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ХАЙУАНИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Хайуандарға хас булған, аң эшсәнлеге менән бәйләнмәгән. *Хайуани теләк. Хайуани хис. Хайуани инстинкт.*

**2.** *ҡусм.* Тупаҫ, культураһыҙ. *Хайуани ҡылыҡ.*

**ХАЙУАНИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Хайуандарға хас сифат; хайуанлыҡ.

**2.** *ҡусм.* Тәрбиәһеҙлектән килеп сыҡҡан тупаҫлыҡ, культураһыҙлыҡ. *Хайуаниәт күрһәтеү.*

**ХАЙУАНЛАНЫУ** *ҡ.* Тәртипһеҙлек күрһәтеү; тәрбиәһеҙләнеү.

**ХАЙУАНЛЫҠ** *и.* **1.** Хайуандарға хас сифат. *Хайуанлыҡ хәленән кешелек хәленә күсеү.*

**2.** *ҡусм.* Тәрбиәһеҙлектән килеп сыҡҡан тупаҫлыҡ; әшәкелек, ҡырағайлыҡ. *Аңлы кешеләр араһында ла хайуанлыҡ көслө була икән. Ә ул нимәнән килә һуң? Әлбиттә, ҡаты күңеллелектән, белекһеҙлектән.* «Ағиҙел», 1971, № 3.

**ХАКАС** *и.* Хакас сияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (төрки телдәрҙең береһендә һөйләшә). *Хакас халҡы. Хакас ҡатыны. Хакас теле.*

**ХАКИМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк.* Хөкөм итеүсе; судья. *Халыҡ мәхкәмәһе составына .. бер хаким менән нәүбәттәге ике заседатель керә.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**2.** Идара итеүсе, түрә. *Ҡаты ҡуллы хаким. Аяуһыҙ хаким.* // *Хаким синыф.* ■ *[Батырша:] Бер хаким мәңге бит тотмаған донъяны. Донъяға Искәндәр, Батый вә Тимерҙәр килгәндәр — киткәндәр.* Р. Ғарипов. **Хаким мотлаҡ** сикләнмәгән хоҡуҡлы хаким. *Ишбулды менән Аҡбикә мәхкүм сифатында тора. Ҡарамырҙа хаким мотлаҡ булып, арлы-бирле йөрөп һөйләнә.* Х. Ғәбитов.

**3.** Нимәнендер эйәһе, хужа. *Йәйҙе еңеп алғас, хаким булып, көҙ бөтөнләй китте шашынып.* С. Ҡудаш. *Ал, дуҫым! Ғорур йөрәкте һинең усыңа һалам. Һин — хаким!* Р. Назаров.

**ХАКИМИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Хөкүмәт, власть. *Хакимиәт башында тороу. Хакимиәтте ҡулға алыу.* ■ *[Сәхипгәрәй:] Хәҙерге шуралар хакимиәтенең тотҡан сәйәсәте башҡаса.* И. Ғизҙәтуллин. *Беҙ хәҙерге ваҡытта залим вә йыртҡыс Николайҙы тәхеттән төшөрөп, капиталистарҙы эш башынан ҡыуып, хакимиәтте үҙ ҡулыбыҙға алдыҡ.* З. Шәрҡи.

**ХАКИМЛЫҠ** *и.* **1.** Хаким булған власть башында торған хәл. *Сит ил хакимлығына ҡаршы көрәш. Батша хакимлығынан азат булыу.*

**2.** Көс-хоҡуҡ йәһәтенән булған өҫтөнлөк. *Политик хакимлыҡ.*

□ **Хакимлыҡ итеү** 1) власть башында тороу, идара итеү. *Хакимлыҡ иткән синыф. Илгә хакимлыҡ итеү*; 2) өҫтөнлөк итеү, хужа булыу.

**ХАҠ** [1] [*ғәр.*] I *с.* **1.** Ысынға тап килгән; дөрөҫ, ысын. *Хаҡ һүҙ.* // *Хаҡты һөйләү.* // *Хаҡ һөйләү.* ■ *[Салауат:] Уның аҡылы саф, вәғәҙәһе хаҡ,*

*баяр, түрәләргә аяуһыҙ.* Б. Бикбай. *Хаҡ шелтәгә яуап һүҙ таба алмай өҙгөләнде .. йөрәк.* К. Кинйәбулатова. *Асылын әҙләп тормоштоң, ваҡлыҡтарын иләнем; хаҡ менән нахаҡ алышын төшөнөргә теләйем.* Р. Бикбаев. *Һин дә миләшкә биргеһеҙ, әллә ҡуҙ, әллә ахаҡ,— янаһың икән төтөнһөҙ, бойоғаһың һин дә минһеҙ, әллә хаҡ, әллә нахаҡ.* М. Басыров. *«Йәшәйһе бар, һаҡла үҙеңде»,— тиһең. Теләктәрең, эйе, хаҡ һымаҡ.* М. Кәрим.

**2.** Дөрөҫлөк, тоғролоҡ төшөнсәһенә ярашлы; ғәҙел. *Хаҡ эш.* ■ *[Юлай:] Юлдың хаҡ икәнен белеп, баш күтәрҙем.* М. Кәрим. *Ир-егеткәй ҡайҙа йөрөһә лә ҡылған эше уның хаҡ булыр* (Халыҡ йырынан).

**3.** Ысын мәғәнәләге; шикһеҙ. *Хаҡ мосолман.* ■ *Хаҡ дошмандар сығып торған икән минең барған юлыма* (Халыҡ йырынан).

II *и.* Нимәлер ҡылырға йәки эшләргә ирек; хоҡуҡ. *Китергә хаҡы юҡ. Һорарға хаҡың бар.* ■ *[Хафиз:] Миңә ундай яла яғырға бер кемдең дә хаҡы юҡ.* М. Тажи. *Һин илама, әсәй, .. хур булыр, тип мине донъяла, минең дә бит кешелек хаҡым бар.* Ғ. Амантай. *Хаҡыңды ал хөр саҡта, берләшеп ҡал форсатта.* Ш. Бабич.

● *Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә.* Әйтем. *Ҡулың пак булһа — эшең хаҡ булыр, эшең хаҡ булһа — йөҙөң аҡ булыр, йөҙөң аҡ булһа — күңелең шат булыр.* Мәҡәл.

**ХАҠ** [2] [*ғәр.*] *и.* **1.** Нәмәнең һатыу-алыуҙа аҡсалата билдәләнгән ҡиммәте; баһа. *Арзан хаҡ. Ҡыйбат хаҡ. Иген хаҡы. Баҙар хаҡы. Хөкүмәт хаҡы. Хаҡ белешеү. Хаҡ ҡуйыу. Нәмәнең хаҡын сығарыу.* ■ *Баҙарҙың һәр урынында халыҡ мыжғып, алыусылары ла, һатыусылары ла шау килеп һөйләшә, ҡул һуғыша, хаҡ бесә, сауҙалаша, алдай, алдана.* Ғ. Дәүләтшин. *[Ҡадир:] Бынау ҡатын-ҡыҙҙар күлдәге ни хаҡ тора?* Б. Бикбай.

**2.** Эшләгән эшкә, түккән көскә аҡсалата ҡуйылған баһа. *Хеҙмәт хаҡы. Эшләгән хаҡты алыу.* ■ *Улар [ҡатын-ҡыҙ] ярты хаҡҡа ас эшләй.* Д. Юлтый. *[Көтөүсе] был байҙың малын яҙ көтә, йәй көтә, көҙ еткәс, эш хаҡын алырға тип байға килә* (Әкиәттән).

**3.** Сит кеше нәмәһе, кеше өлөшө. *Кеше хаҡын ашау. Кеше хаҡына теймәү.* ■ *[Әхмәтшәриф бабай:] Халыҡ һүҙен ташламаһаң, кеше хаҡын ашамаһаң күңелең аҡ, йөҙөң шат булыр.* А. Игебаев. *Йәтим-йәтим тимәгеҙ, йәтим хаҡын ешмәгеҙ* (Ҡобайырҙан).

**4.** *күсм.* Тотҡан әһәмиәтенән сығып бирелгән баһа; хөрмәт, ҡәҙер. *Күрше хаҡы. Оло кеше хаҡы. Сабый хаҡы.* ■ *Фронтовиктар ҡайтты. Ул юҡ ине. Аңлашылды һүҙһеҙ был хәбәр. Бәхет хаҡы күп ғүмерҙәр тора, ҡәҙерле ул ирек шул ҡәҙәр.* М. Хәй.

♦ **Ҡәләм хаҡы** *иҫк.* әҫәре өсөн яҙыусыға договор буйынса түләнгән аҡса, гонорар. *Ҡәләм хаҡын түләү.* ■ *[Хөсәйен:] Китабыңды баҫтырырбыҙ, ҡәләм хаҡыңдың бер аҙын бөгөн үк бирергә мөмкин.* С. Ҡудаш. **Тамаҡ хаҡы** (*йәки* **ялы**) ашау-эсеү иҫәбенә. *Тамаҡ хаҡына эшләү.* **Үҙенә төшкән хаҡ** нәмәне етештереүгә киткән сығымдар иҫәбенән килгән хаҡ. **Хаҡ бесеү** һатыулашып, хаҡ килешеү. *Баҙарҙың һәр урынында халыҡ мыжғып тора. Алыусылары ла, һатыусылары ла шау килеп һөйләшә, ҡул һуғыша. Хаҡ бесәләр, сауҙалашалар.* Ғ. Дәүләтшин. **Хаҡы** (*йәки* **бото) һуҡыр бер тин** кәрәге, әһәмиәте юҡ тигән мәғәнәлә әйтелә. **Хаҡы өсөн** *йәки* **хаҡына тип** кем йәки нимәнелер ололау, уға хөрмәт, ихтирам йөҙөнән. *Балалар хаҡы өсөн ғәфү итеү.* **Юҡ хаҡҡа** (*йәки* **хаҡ менән**) бик арзан, осһоҙ хаҡҡа.

**ХАҠ** [3] [*ғәр.*] *и.*, **хаҡ тәғәлә** *иҫк.* Дини ҡараш буйынса: бөтә донъяны яратҡан, уның менән идара иткән юғары зат; хоҙай, алла (алланы ололау һүҙе). *Хаҡ бәндәһе. Хаҡҡа тапшырыу.* ■ *Ғүмереңде үткәрмә һин юҡты теләп, хаҡ ҡаршында ҡабул булмаҫ бындай теләк.* М. Ғафури. *Хаҡ тәғәлә насип ҡылһын һау-сәләмәт ҡайтырға* (Бәйеттән).

♦ **Йәнеңде хаҡҡа тапшырыу** үлеү. **Хаҡ донъя** ислам дине буйынса үлгәндән һуң йәшәй торған урын; әхирәт; *киреһе* фани донъя. *[Хәжәр:] Был донъяла ҡәҙеремде белмәне, хаҡ донъяла аллаһы тәғәлә күрһәткән изгелектәремде еткерер үҙенә [иремә].* Ш. Янбаев. **Хаҡ яҙмыш** күрәсәк, яҙмыш. *Маңлайыңа яҙылған хаҡ яҙмышты һыпырып ташлап булмай ҡул менән* (Халыҡ йырынан).

● *Ҡарама ҡабығы ҡаҡ булмай, хаҡ бәндәһе таҡ булмай.* Әйтем.

**ХАҠАН** *и. иҫк. тар.* Урта быуаттарҙа төрки халыҡтарының хөкүмәт башлығы титулы һәм шул титулды йөрөткән кеше; ҡаған. *Матурлыҡта тиң юҡ Ҡытай иленә, көнләшә унан ғүзәл баг гөлө лә; был илдең шаһы — олуғ бер хан булған, хан тимә, о ул олуғ хаҡан булған.* М. Харис.

**ХАҠАРАТ** [*ғәр.*] *и. кар.* **хәкәрәт.** *Хаҡарат булыу. // Хаҡарат һүҙ.* ■ *[Ҡарамырҙа:] Күргәнем юҡ бындай хаҡаратты.* Х. Ғәбитов.

**ХАҠАРАТЛАУ** *к. кар.* **хәкәрәтләү.**

**ХАҠИР** [*ғәр.*]: **хаҡир булыу** *иҫк. кит.* хур булыу, кәмһетелеү. *Хур булып, хаҡир булып үтте Себерҙә көндәре.* С. Ҡудаш. **Хаҡир итеү** хур итеү, кәмһетеү.

**ХАҠЛАНЫУ** *к.* Ғәйепһеҙ тип танылыу; аҡланыу. *Хаҡланып сығыу. Хаҡланып ҡалыу.*

**ХАҠЛАУ** [1] *к.* **1.** Дөрөҫ тип табыу; хуплау. *[Баксасы:] Мин дә быны хаҡлайым. Үҫегеҙ, сәскәләнегеҙ, матурланығыҙ.* М. Фәйзи.

**2.** Ғәйепһеҙ тип табыу; аҡлау.

**ХАҠЛАУ** [2] *к.* Ихтирам йөҙөнән сығып баһалау, хөрмәт күрһәтеү. *Аш хаҡын хаҡлау.* ■ *Иптәш хаҡын хаҡлап, барыһын ташлап, йыраҡ юлдарға ла мин сығам.* Ғ. Рамазанов.

**ХАҠЛЫ** [1] *с.* **1.** Уй-фекере, һүҙе, ҡылған эше ысын хәлгә, дөрөҫлөккә ярашлы; дөрөҫ булған. *Хаҡлы булып сығыу.* ■ *Ғәләү уны [йылы] кейендереү хәстәренә керешә. Башта Нигмәт бик риза булып бөтмәне, ләкин көндәр ағышы дөҫөнең хаҡлы икәнлегенә тиҙ ышандырҙы.* Б. Бикбай. *Хаҡлы, тип, беҙҙең теләкте хуп табып, вәғәҙә биргән ине тәңре күптән үк.* Ш. Бабич. *Сәйҙел үҙ һүҙендә хаҡлы ла .. бала, семья — йәшлек йөгө.* Ғ. Сәләм.

**2.** Урынлы, тейешле. *Хаҡлы һорау.*

**ХАҠЛЫ** [2] *с.* Хаҡы, хоҡуғы булған; хоҡуҡлы. *Хаҡлы булыу.* ■ *Унда кешеләр эшкә, ялға хаҡлы, унда кешеләр йырға хаҡлылар.* Ғ. Сәләм. *Бер тамсы нур, бер тамсы моң кешеләргә көн һайын бирә алһам, йырланырға хаҡлымындыр, моғайын.* М. Кәрим.

**ХАҠЛЫ** [3] *с.* Хаҡы ҙур булған; ҡиммәтле. *Хаҡлы тауар. Хаҡлы булыу.* ■ *Ай яҡтылары яҡты ла, көмөш кенә эйәр хаҡлы ла* (Халыҡ йырынан).

● *Хаҡлы нәмә — затлы нәмә.* Әйтем.

**ХАҠЛЫҠ** *и.* **1.** Дөрөҫ, ғәҙел эш-хәл; ғәҙеллек. *Кем хаҡлыҡтан ҡаса, ул ялғандың ҡорбаны буласаҡ.* Р. Назаров.

**2.** Ғәҙеллеккә, дөрөҫлөккә нигеҙләнгән ысынбарлыҡ. *Хаҡлыҡ өсөн көрәшеү. Хаҡлыҡ яҡлау.* ■ *Барған урыныңа шатлыҡ алып бар. Ирек һәм бәхет, хаҡлыҡ алып бар.* М. Хәй. *Күҙҙәремдә балҡый хаҡлыҡ нуры, күкрәгемдә таҙа, ныҡ иман, ярлы илде ғизгән алтындарға сәждә итмәм, һис тә баш эймәм!* Д. Юлтый.

**ХАҠЛЫҠ-ДӨРӨҪЛӨК** *и. йыйн.* Ғәҙеллек, дөрөҫләк. *Дөрөҫлөктө ялған быуа алмаҫ — хаҡлыҡ-дөрөҫлөккә хөкөм юҡ.* Ҡ. Даян.

**ХАҠ-НАХАҠ** *и. йыйн.* Дөрөҫлөк һәм ялғанлыҡ. *Ғорур булһы, егет, ғорур бул, хаҡ-нахаҡты еңеп сығыр бул.* Р. Шәкүров.

**ХАҠТА** *бәйл.* Төп һәм эйәлек килешендәге алмаштарҙы бәйләп килә; турала. *Был хаҡта. Ошо хаҡта. Ул хаҡта. Шул хаҡта. Минең хаҡта. Һинең хаҡта.* ■ *Тимер батыр шунда уҡ юлға сығырға булған. Был хаҡта ата әсәһенә лә әйткән* (Әкиәттән).

**ХАҠҺЫҘ** [1] *с.* **1.** Уй-фекере, һүҙе, эше ысынға тура килмәгән, дөрөҫ булмаған. *[Аҡбикә:] Ҡотҡар, бейем, беҙгә асыу тотма, хаҡһыҙ хөкөмөңдө йөрөтмә!* Х. Ғәбитов. *Мансуров эшкә тотонғас, үҙенең хаҡһыҙ икәнлеген тиҙ төшөндө.* Б. Бикбай.

**2.** *Урынһыҙ, тейешһеҙ. Хаҡһыҙ дәғүә. // Берәүҙе кисә хаҡһыҙ маҡтаным, иртән торғас, үҙ-үҙемә бер аҡланыу тапманым.* М. Кәрим.

**ХАҠҺЫҘ** [2] *с.* Түләүһеҙ-һиһеҙ; буш. *Хаҡһыҙ хеҙмәтсе. // Хаҡһыҙ эшләү.* ■ *Теләһәгеҙ, ана минең ике ҡыҙымды грамотаға өйрәтегеҙ. Ашау-эсеү хаҡһыҙ булыр.* М. Тажи.

**ХАҠҺЫҘЛАНЫУ** *ҡ.* Хаҡы, ҡиммәте бөтөү; хаҡһыҙға әйләнеү. *Аҡса хаҡһыҙлана бара.*

**ХАҠҺЫҘЛЫҠ** *и.* Дөрөҫлөк, тоғролоҡ төшөнсәһенә ярашһыҙ эш-хәл; ғәҙелһеҙлек. *Емерелә вәхшәт, хаҡһыҙлыҡ, золом; аҡрын-аҡрын нур сәсеп хаҡлыҡ килә.* Ш. Бабич.

**ХАҠЫНА** *бәйл.* Төп килештәге исемде һәм эйәлек килештәге алмашты бәйләп килә; өсөн. *Ата-әсә хаҡына. Бала хаҡына. Уның хаҡына.* ■ *[Ҡорбан:] Яҙғы сәсеү өҫтөндә мин иген күп сәсә торған кешеләргә тамаҡ хаҡына ялланып, ер тырматырға, бесән етһә — күбә тарттырырға йөрөнөм.* С. Ҡудаш. *Һис зарар юҡ, ал, тине ай, ал да сәс нур халҡыңа; мин дә бит төн хаҡына алдым кояш нурҙарын.* Ш. Бабич.

**ХАҠЫНДА** *бәйл.* Төп килештәге исемде һәм эйәлек килештәге алмашты бәйләп килә; тураһында, турында. *Ата-әсә хаҡында. Эш хаҡында һөйләшеү. Уның хаҡында.* ■ *Поэма хаҡында фекер әйтеүҙәрен һораным.* Ғ. Сәләм. *Һонтай егетенең .. бик яҡшы тороп ятыуы хаҡындағы хәбәр батшаға ла барып етә* (Әкиәттән).

**ХАЛАЙЫҠ** [*ғәр.*] *и. йыйн.* Бар халыҡ, күмәк кеше. *Йыйылған, ти халайыҡ Мәсем ханға, пәйҙә булды бер бәлә, тип, беҙҙең йәнгә.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ХАЛАС** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Азат булған, ҡотолған хәл. *Был һуғышта нәфкәләрем бөтөр микән, был илдәрҙән халас көнөм булыр микән?* (Бәйеттән).

□ **Халас булыу** азат булыу, ҡотолоу; ҡотҡарылыу.

**ХАЛА́Т** [*рус.* ⟨ *ғәр.*] *и.* **1.** Ҡайһы бер халыҡтарҙың оҙон итәкле, төймәһеҙ елән һымаҡ өҫ кейеме. *Үзбәк халаты.* ■ *Сара Сабировнаның өҫтөндә эре уҡа биҙәкле япон халаты, аяғында сәмсәле ҡазан өй туфлие.* З. Биишева.

**2.** Алдан йәки арттан эленмәле итеп тегелгән өйҙә йәки эштә кейә торған өҫ кейеме. *[Гөлдәргә] таман ғына аҡ халат кейҙереп ебәрһәң, врач апайға оҡшар ҙа ҡуйыр ине.* К. Кинйәбулатова. *Эш башланыр ваҡыт етте. Ҡатын-ҡыҙ зәңгәр сатин халат кейеп, станоктар эргәһенә баҫты* «Совет Башҡортостаны», 1971, 22 август.

**ХАЛАУ** [*ғәр.*] *и.* Балыҡ һурпаһы. *Халау бешереү.* ■ *Балыҡсы ғәҙәте буйынса халау бешереп ашаныҡ, ҡайһы берәүҙәребеҙ йоҡлап алды, оҙаҡ итеп һыу индек.* Ә. Чанышев.

**ХАЛИ** [*ғәр.*] *с. кит.* Ниҙәндер азат, буш. *[Аралбаев:] Башҡа кешеләр кеүек, мин дә хатанан хали түгелмен.* З. Хисмәтуллин. *Ҡәһәр, ләғнәт ямғырынан хали була алмайбыҙ.* Ғ. Ибраһимов.

**ХАЛИҠ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *дини* Дини ҡараш буйынса: бөтә донъяны яратҡан, уның менән идара иткән юғары зат; хоҙай, алла (алланы ололау һүҙе).

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ХАЛИС** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Саф, таҙа, ысын. *Халис башҡорт. Халис төрөктәр.*

**2.** *р. мәғ. күсм.* Бик, үтә. *Халис арыҡ ат. Халис матур ҡыҙ.*

**ХАЛҠӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Табын түңәрәге. *Мәжлес халҡәһен ҡороп, ҡымыҙ илә халыҡты хөрмәтләнеләр.* «Батыршаның хаты».

**ХАЛТУ́РА** [*рус.* ⟨ *лат.*]. *и. һөйл.* **1.** Өҫтәмә аҡса алыу өсөн файҙаланылған сит кәсеп һәм ошо кәсеп менән алынған өҫтәмә аҡса.

**2.** Өҫтән-мөҫтән, ашыҡ-бошоҡ ҡына башҡарылған эш./ Ошо юл менән эшләнгән нәмә.

**ХАЛТУРАСЫ** *и. һөйл.* Эшен өҫтән-мөҫтән, илке-һалҡы ғына башҡарған кеше.

**ХАЛЪЯ** *и. диал. ҡар.* **талпан** [1]. *Тәнгә халъя ҡаҙалды.*

**ХАЛЫҠ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Билдәле бер илдә йәки дәүләттә йәшәгән кешеләр. *Совет халҡы. Польша халҡы. Сит ил халҡы. Халыҡ байлығы. Халыҡ хужалығы.* ■ *Халыҡтары беҙҙең Ватандың күп һанлы, күп төрлө.* Р. Ниғмәти.

**2.** Ырыуҙар берләшеү һөҙөмтәһендә тел, йәшәгән ер, культура һәм экономик тормоштағы уртаҡлыҡ нигеҙендә билдәле бер тарихи шарттарҙа бер бөтөн булып ойошҡан кешеләр төркөмө. *Төрки халыҡтары. Милли өлкәләр халҡы.* ■

*Боронго башкорт кәбиләләренең халык булып тамам формалашыу осоро XV-XVI быуаттарга тап килә.* Ж. Кейекбаев./ Милләт. *Рус халкы. Венгр халкы.*

**3.** Илдә йәшәүселәрҙең төп өлөшөн тәшкил итеүсе хеҙмәт эйәләре. *Эшсән халыктар. Ауыл халкы. Кала халкы.* / Кеше, зат. *Катын-кыҙ халкы. Ирҙәр халкы.*/ Билдәле бер профессияға, даирәгә караған кеше. *Артист халкы. Укытыусы халкы. Эшсе халкы.* ■ *Ғөмүмән, беҙҙә механизаторҙар халкы күпселекте тәшкил итә бара. Һәр ике өйгә бер шофёр, йә комбайнер, йә тракторист тура килә.* «Совет Башкортостаны», 1968, 8 апрель.

**4.** Күмәк кеше; масса. *Халык менән эш итеү.* / Хеҙмәт кешеләре, хеҙмәтсән масса. *Халыкка таяныу.* ■ *Һәр канымдың һуңғы тамсыһын илем, халкым өсөн бирермен.* Х. Кунакбай.

**5.** Кайһы бер һүҙбәйләнештәрҙә аныклаусы ролен үтәп, күмәк кеше ижадына бәйле булғанды белдерә. *Халык йолаһы. Халык йыры. Халык мәкәле. Халык теле.*

**6.** Кайһы бер эш урынының йәки хеҙмәт исеменең составында кулланыла. *Халык суды. Халык контроле.*

**7.** Сәнғәт, фән әҙәбиәттәге уңыштар өсөн бирелгән мактаулы исем составында кулланыла. *Халык артисы. Халык шагиры.*

♦ **Ерле халык** билдәле бер урында йәшәгән кешеләр. *Һалдаттарҙы кыҫәтегеҙ, ерле халыкка карата бер ниндәй ҙә уҫаллык кылмаһындар, тине генерал.* Ғ. Аллаяров. **Кара халык** наҙан халык. **Халык демократияһы** пролетариат диктатураһынан торған, күп партиялылык менән билдәләнеп, марксистик-ленинсы партияның өҫтөнлөгөнә нигеҙләнгән политик төҙөлөш формаһы. **Халык комиссары** (1946 йылға тиклем) халык комиссариатының береһе менән етәкселек иткән совет хөкүмәте ағзаһы. **Халык комиссариаты** (1946 йылға саклы) министерстволар төҙөлгәнгә тиклем СССР-ҙың хужалык һәм культура төҙөлөшөндәге айырым тармактар менән идара иткән үҙәк дәүләт органы. **Ярҙай халык** тамаша кылған күмәк халык. *[Салауат:] Атамдан мине һуктырып, ярҙай халык алдында намыҫымды тапатып, күңелегеҙ булмаһын!* М. Буранғолов.

● *Атаң улы гына булма, халкыңдың да улы бул.* Мәкәл. *Диңгеҙ кипмәҫ, халык үлмәҫ.* Мәкәл.

**ХАЛЫК-АРА** *с.* **1.** Төрлө ил, төрлө халык араһындағы бәйләнешкә мөнәсәбәтле. *Халык-ара хәл. Халык-ар ярыш. Халык-ара договор.*

**2.** Күп халыктарҙы эсенә алған, төрлө халыкка таралған. *Халык-ара катын-кыҙҙар көнө. Халык-ар коммунистик хәрәкәт.*

**ХАЛЫКЛАШЫУ** *к.* Халык араһына таралыу, халыктыкы булып үҙләшеү. *Халыклашкан йыр.* ■ *Аҙактан ул бәйеттең авторы онотолоп бөтөнләй халыклашып, коллектив ижад төҫөн ала.* Ғ. Хөсәйенов.

**ХАЛЫКСАН** *с.* Халыкка якын торған, уның рухи байлығын, ынтылышын сағылдырған. *Халыксан сәнғәт. Халыксан әҫәр. Халыксан рухта тәрбиәләү.*

**ХАЛЫКСАНЛЫК** *и.* Халыксан булыу. *Образдың халыксанлығы иң тәүҙә халыктың тормошона һәм көрәшенә, ижтимағи аңына һәм эстетик зауккына нигеҙләнгән булыуында.* Ә. Хәкимов.

**ХАЛӘТ** [*ғәр.*] *и. кит.* Кем йәки нимәнеңдер билдәле бер вакыттағы торошо, хәле. *Ер планетаһы газ халәтенән катып, өҫтөндә йән эйәһе ярала башлағандан бире беҙ осона сыға алмаҫлык күп .. вакиғалар .. булған.* И. Насыри. *Ике-өс йылдан бирле һуғыш майҙанында йөрөй торғас, беҙ инде был халәткә тамам күнеп бөттөк.* Ғ. Рамазанов./ Кешенең рухи хәле, кәйефе. *Былбылдарҙың моңдары ла халәтемә пар кеүек.* Р. Басимов.

**ХАМ** [*фарс.*] *с.* Еренә еткереп эшкәртелмәгән, сейле-бешле. *Ерҙәрендәге тәбиғи байлыктарын, хам нәмәләрен сит мәмләкәттәргә һатырға мәжбүр булалар.* Ғ. Ғисмәти.

**ХАМЕЛЕО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Кеҫәрткеләр отрядына караған йәшәгән урынына яраклашып төҫөн үҙгәртә торған һөйрәлеүсе йәнлек.

**2.** *кусм.* Үҙ мәнфәғәтен һаклау өсөн карашын, фекерен тиҙ үҙгәртә торған аумакай кеше.

**ХАМИЛӘ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ауыры булған, йөклө (катынға карата). *Нурсәйеттең бер калмык катыны бар ине, хамилә ине.* «Башкорт шәжәрәләре», 1960.

**ХАМСА́** [*рус.*] *и.* Сельдтар төркөмөнә караған вак диңгеҙ балығы.

**ХАН** *и. тар.* Төрки һәм монгол халыктарында дәүләт башлығы титулы һәм шул титулды йөрөткән кеше. *Кырым ханы. Хан кыҙы. Хан һарайы. Хан булыу.* ■ *Мәсем хандың алыҫ киткән яманаты, уны белгән Урал буйы, Урал арты, карағайлы кара урман, бик киң сахра, Ағиҙелдең буйы булған мәканәте.* «Бабсак менән Күсәк». *Ханға бирһәң кулыңды, ханға төшәк йәйерһең, төшһәң менгән атыңдан ханға башың эйәрһең* (Кобайырҙан).

♦ **Хан алсы** ир балалар уйыны (ашык бүлешеп алалар; бер ашыкты кыҙылға буяп, «хан» итәләр; шунан уйнаусылар ашыктарҙы тотош һибең ебәрәләр ҙә, ятышына карап, алсыһын алсы, бөгәһен бөгә менән сиртеп алалар; үҙенә тейеш ашыкты алып бөткән кеше «ханды» ата; кем «ханды» ала — шул ота). *Хан алсы уйнау.* **Хан заманындағы** *йәки* **хан заманынан калған** әллә касанғы, күптәнге. *Яңырак сыккан «Иж-56» тамғалы мылтык алып ебәрһәң, эсеңдә тишер инеме: бынауы хан заманындағы мылтыкты һөйрәп йөрөткәнсе.* Ә. Чаныш. **Хан кыҙы** (*йәки* **егете**) бик иркә, эш яратмай торған кыҙға йәки егеткә карата әйтелә.

● *Барма бейгә, үҙе килер өйгә; барма ханға, үҙе килер малға.* Мәкәл. *Кейәү һыйы — хан һыйы.* Әйтем. *Кайһы ырыу көслө — ханды шул куя, кайһы ырыу үсле — канды шул коя.* Мәкәл. *Кар башына кар етер, хан башына хан етер.* Әйтем. *Хан килә, хан артынан кан килә.* Әйтем. *Хан күп булһа, яу күп булыр, бей күп булһа, дау күп булыр.* Әйтем.

**ХАНА** [1] [*фарс.*] *и. иҫк.* **1.** Кеше йәшәй торған урын; йорт, бина.

2. Ҡайһы бер ҡушма һүҙҙәрҙең икенсе компоненты булып килә. *Китапхана. Ашхана. Дауахана.*

● *Эшсән ханаһы туп-тулы, ялҡау-ханаһы буп-буш.* Әйтем.

**ХАНА** [2] [*рус.*] *с.* Хөрт, мөшкөл; харап. *Эштәр хана.* ■ *Кашапов борсолоу менән дауам итте: — Хана, туған! Игенселек культураһы тураһында институтта беҙгә күп тылҡыныдар. Ә бында ул — ташҡа үлсәйем.* Я. Вәлиев.

**ХАНАҠА** [*фарс.*] *и.* Суфыйҙар, дәрүиштәр торған өй.— *Ханаҡа?! — Арыҫлан батырҙың бындай һүҙҙе ишеткәне юҡ, күрәһең.* Ғ. Ибраһимов.

**ХАНБИКӘ** *и. тар.* Хан бисәһе; ханса. *Батша үҙенең ханбикәһе менән залға, сәскәләр ҡуйылған ергә йүгереп барған* (Әкиәттән).

**ХАНЗАҘА** [*фарс.*] *и. тар.* Хан улы.

**ХАНЖА** [*рус.*] *и. һөйл.* Монафиҡ, ике йөҙлө кеше. *Ҡара эсле ханжа.*

**ХАНЛЫҠ** *и. тар.* **1.** Хан булыу хәле.

2. Хан идара иткән дәүләт. *Ҡаҙан ханлығы.* ■ *Заятүләктең туғандары бер-береһенә ҡул күтәргән, ханлыҡ бөтөнләй емерелгән.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ХАНСА** *и.* **1.** Ҡатын-ҡыҙ.

2. Хан бисәһе. *Хандың ҡыҙын алһана! Һин хан, ул ханса булып, шыбырлашып һөйләшеп, шәрбәт эсеп, серләшеп, дәүран гүмер һөрһәнә!* (Ҡобайырҙан).

**ХАНТ** *и.* Хант-Манси һәм Ямал-Ненец автономиялы округтарында йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (уғыр-фин телдәренең береһендә һөйләшә). *Хант халҡы. Хант ҡатыны. Хант теле.*

**ХАНЫМ** *и.* **1.** Кейәүҙә булған ҡатын-ҡыҙ; ҡатын кеше. *[Ғөбәй-Ғарифка:] Һин уны гел ханым тип һөйләйһең, әлек тормошта булғанмы әллә?* Н. Иҙелбай.

2. Таныш булмаған ҡатын-ҡыҙға ҡарата ҡулланыла. *Офицерҙар ханымдар, ҡыҙҙар менән көләшеп һөйләште.* Д. Юлтый./ Ҡатындарға хөрмәтләп өндәшкәндә ҡулланыла. *Зәйнәпкә ҡараны йәш эсә: «Эйе ханым, һүҙең дөрөҫ»,— ти.* Ғ. Сәләм.

**ХАНЫШ** *и. ҡар.* **ханса.**

**ХАОС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Боронғо грек мифологияһында: донъя барлыҡҡа килгәнгә тиклемге стихия.

2. *күсм. һөйл.* Тәртипһеҙлек, буталсыҡ.

**ХАПАТАЙ** *с. диал.* Әрпеш. *Хапатай кеше.*

**ХАПЫР-ХОПОР** *оҡш. ҡар.* **шапыр-шопор.** *Хапыр-хопор итеү. Хапыр-хопор килеү.* ■ *Малайҙар һөйләшеүҙәргә ҡолаҡ һалмай, икмәктәрен шаҡара ҡабып хапыр-хопор сәй эсергә керештеләр.* Б. Бикбай.

**ХАР** [1] [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Эҫелек. *Аҡрынлап ут итер һыуҙы ла хар.* М. Ғафури.

**ХАР** [2] [*фарс.*] *и. иҫк.* Сәнеске, ҡылсыҡ.

**ХАРАБА** [*ғәр.*] *и.* Емерек хәлгә килгән йорт-бина, ҡаралты, төҙөлөш нәмәләре. *Хараба хәлендә булыу.* ■ *Ҡаршыла янған ауыл, .. унан урман, тимер юл, тағы ауылдар, тағы көл өйөмдәре, ҡот оскос харабалар.* Ғ. Ибраһимов. *Беҙгә дошмандар һәләкәтле һуғышты көслөп тағы. Ҡалалар харабаға, сәскә атыусы баҡсалар — ҡәберлеккә әйләнде.* М. Кәрим.

**ХАРА́КТЕР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Кешенең ҡылығында сағылған тотороҡло психик үҙенсәлектәр, эске тәбиғәт; холоҡ. *Йомшаҡ характер. Ҡыҙыу характер. Ҡаты характер.* ■ *Улар бер-береһенә ҡапма-ҡаршы характерҙағы кешеләр: редактор тиҙ генә ҡыҙыусан, ҡорораҡ, ә секретары башын баҫып үҙ алдына эшләргә яратыусан.* Б. Бикбай.

2. Көслө ихтыяр, ныҡлыҡ. *Характеры булмаған, йомшаҡ кеше.*

3. Нимәләрҙер хас үҙенсәлекле күренеш, төҫ, сифат. *Милли характер. Сатирик характерҙағы әҫәр. Политик характерҙағы сығыш.* ■ *Мәжлес митинг характерын алып китте.* Д. Юлтый.

4. *әҙ.* Билдәле бер йәмғиәттә йәшәгән кешеләрҙе типик үҙенсәлектәрен сағылдырған әҙәби шәхес, образ, тип. *Характерҙы асыу. Дөйөмләштерелгән характер.* ■ *Ысын әҙәби характер, ваҡиғалар ҡоло булып ҡына ҡалмайынса, .. сюжеттың үҫешенә сәбәпсе була.* К. Әхмәтйәнов.

**ХАРАКТЕРИ́СТИКА** [*рус.*] *и.* **1.** Кемдең йәки ниҙеңдер үҙенсәлекле һыҙаттарын, етешле-етешһеҙ яҡтарын күрһәткән баһа. *Характеристика биреү.*

2. Кешенең эш-тәртибен баһалау рәүешендә бирелгән рәсми ҡағыҙ. *Характеристика яҙыу.*

3. *махс.* Ниҙеңдер үҙенсәлектәрен билдәләгән график күрһәткес. *Машинаның характеристикаһы.*

**ХАРАКТЕРЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **характерлау.** *Ыңғай яҡтан ғына характерланыу.*

**ХАРАКТЕРЛАУ** *ҡ.* Кем йәки нимәләрҙер хас һыҙаттарҙы, үҙенсәлектәрҙе күрһәтеү; характеристика биреү; ҡылыҡһырлау. *Халыҡ-ара хәлде характерлау. Яҙыусының ижадын характерлау.*

**ХАРАКТЕРЛЫ** *с.* **1.** Үҙенә бер төрлө; үҙенсәлекле. *Характерлы бейеү. Характерлы образ. Характерлы сюжет.*

2. Кем йәки нәмәлә була торған, кем йәки нәмәгә хас. *Боронғораҡ заманда башҡорт халҡының йыр репертуарында сюжетлы эпик йырҙар төп урынды тотһалар, һуңғыраҡ осор өсөн лирик йөкмәткеле йырҙар характерлы.* С. Галин.

**ХАРАМ** *с. ҡар.* **хәрәм.** *Харам аш. Харам мал.*

◆ **Харам ҡолаҡ** *диал.* йөрәк ҡапҡасы (*ҡар.* **йөрәк** 1).

**ХАРАП** [*ғәр.*] *с.* **1.** Мөшкөл, насар. *Эштәр харап.* ■ *Ныязғол үҙенең һүҙе үтмәгәнен күргәс, урынынан ҡуҙғалды.. Ысынлап та, ерҙәр шулай итеп уның ҡулынан ысҡынып ҡуйһа, харап бит.* Һ. Дәүләтшина.

2. *р. мәғ.* Бик, үтә. *Харап килешле. Харап арытты.* ■ *[Хөмәйрә:] Ҡыҙы харап егәрле, эшләмәгән эше юҡ.. Күрмәгә лә харап матур. Буй-һыны бар.* Ж. Кейекбаев. *[Максим:] Харап асыҡтырғайны ҡайнар аш менән һыйланып алабыҙ икән әле!* Д. Исламов.

3. *мөн. мәғ.* Мыҫҡыллау, кәмһетеү тойғоһон белдерә. *[Шәһәрбаныу:] Харап, сатан түрә бисәһе булған да, шәбәйгән!* Һ. Дәүләтшина. / Үпкәләү тойғоһон белдерә. *Иркәләтмәй, харап, йылмайһаңсы ҡарап* (Халыҡ йырынан).

□ **Харап булыу** һәләк булыу, юкка сығыу. *Рәтле карау юк, харап була ат, харап була.* Б. Бикбай. **Харап итеү** һәләк итеү, юкка сығарыу. *[Бабай менән әбей:] Балакайым аяк атлайһы ла булма, һыу хужаһы дейеү харап итер үҙеңде* (Әкиәттән).

♦ **Бер ҙә харап** аптырағанда, ғәжәпләнгәндә әйтелә. *Мин әйтәм: «Ну, мин булдыра алмайым быны»,— тим, йөрәк инде, бер ҙә харап, сығып килә.* Т. Йәнәби. **Харап [булған] икән** кешенең эш-кылығын, ниәтен хупламағанда мыҫкыл менән әйтелә. *[Кыпсактар] шакмандарҙың аҫабалык даулап тызырайыуҙарынан: «Ай-һай, харап икән, олаталары батшаға барған»,— тип көләләр генә.* Б. Бикбай.

**ХАРҘА** *и.* **1.** Һыуҫарҙар ғаиләһенә караған затлы тиреле ҙур булмаған йырткыс йәнлек. *Харҙа тиреһе.* ■ *Харҙаның йөнө урман һыуҫары йөнөнән байтак кайтыш була.* К. Фәхретдинов.

**2.** *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Харҙа бүрек.*

**ХАРИКЫЛҒАДӘ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ғәҙәттән тыш. *Башкорттар Асылыкүлдә .. әллә ниндәй бер кеүәт барлығын, .. харикылғадә эштәр булғанын һөйләйҙәр.* М. Ғафури.

**ХАРИТА** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Карта. *Харитаға төшөрөү. Географик харита. Башкортостан харитаһы.* ■ *Хаританан табыу еңел ине кайһы ерҙең кайҙа икәнен.* М. Абдуллин.

**ХАРУНЪЯ** [*рус.* хорунжий] *и. тар.* Революцияға тиклемге Россияла казак ғәскәрендәге түбәнге офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше. *Харунъя чины.* ■ *[Сәлимгәрәй бай:] Минең олатайым Ырымбур генерал-губернаторы мәрхүм Перовский заманында атлы ғәскәрҙә харунъя булған.* Ж. Кейекбаев.

**ХАРЧЁВНЯ** [*рус.*] *и. иҫк.* Тамак туйҙырып сыға торған урын; трактир. *Харчевня йорто. Харчевня тотоу.* ■ *Яҙ көнө Усияла [пристанда] Ғәли Әхмәтов тигән кешенең харчевняһына айға дүрт һум илле тингә ялландым.* А. Таһиров.

**ХАС** [1] *с.* **1.** Үҙенә бер төрлө, үҙенсәлекле, характерлы. *Йәштәргә хас сифат. Өлкәндәргә хас олпатлык. // Кыҙҙарға хас булғанса. Көньякка хас рәүештә.* ■ *Мин хәҙергә әле кала кыҙы, .. ауылдың да хас бер ғүзәллеген иң беренсе тапкыр күреүсе.* С. Кулибай. *[Сәғиҙә] ауылдың үҙенә генә хас йолаһы, йыр моңо менән зауыкланды.* М. Тажи. *Тимер йәштәргә хас рәүештә тиҙ [карар итте].* Б. Бикбай.

**2.** *киҫ. мәғ.* Сағыштырыу, окшатыуҙы көсәйтеп килә; нәк, тап. *Хас та атаһы.* ■ *Улар [карғалар] хас аяктары ыскынып, йығылып төшөрҙәр кеүек ине.* Р. Солтангәрәев. *Күҙҙәрең сөм кара, хас күмер, бер карауы үҙе бер ғүмер.* Н. Нәжми. *Кейгәндәр улар матур күлдәктәр. Балалар уйнай хас күбәләктәр.* Ә. Вахитова. *Үрге яктан берәү килә хас та яныйым атлауы* (Халык йырынан).

**ХАС** [2] [*фарс.*] *с.* Кемгәлер каныккан; конло, үсле. *Хас кеше.* ■ *Батыр ғына егет ай шул булыр — хас дошмандың етер башына* (Халык йырынан).

□ **Хас итеү** (*йәки* **кылыу**) 1) үс итеү, үслек, яманлык кылыу. *Теге ғифрит ант итте, ти, әҙәм затына һис бер хас кылмам бынан артабан, тип әйтте, ти* (Әкиәттән); 2) канығыу. *Карағөлөмбәт [Бабсак катынын] алырға хас итте.* «Башкорт шәжәрәләре», 1960.

● *Ике ас бер-береһенә хас.* Әйтем. *Якшы бала иленә баш булыр, яман бала иленә хас булыр.* Әйтем.

**ХАСИЛ** [*ғәр.*] *и.* Нәтижә, һөҙөмтә.

□ **Хасил булыу** барлыкка килеү, яралыу. *Уйһыу-уйпат урындарҙа .. бәләкәс кенә күлдәр хасил булған.* К. Мәргән. *Рауил сисенде лә һыуға һикерҙе. Ул һыуға сумған ерҙә ҙур түлкын куласаһы хасил булды.* Ф. Әсәнов. **Хасил итеү** барлыкка килтереү. *Бәлки Корған һыуы даръяның бер түлкынын .. хасил итәлер.* Х. Ғиләжев.

♦ **Хасиле кәләм** һүҙҙең кыҫкаһы, кыҫкаса әйткәндә.

**ХАСИТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Үҙеңдә юкты бүтәндәрҙә күреп эстән үртәнә торған тар тәбиғәтле кеше; көнсөл кеше. *Хаситтарҙың үткер кылысынан кырктырырға бирмәм телемдә.* Х. Ғәбитов.

**ХАСЛАНЫУ** *к.* **1.** Кем йәки нимәгәлер каршы хаслык уйлау, үсләшеп канығыу. *Хасланып йөрөү.* ■ *[Рыҫкол:] Барыһы ла шул Якуп старшинаның этлеге. Хасланды, елкәмә атланмаксы итә, алдында теҙ сүгеүемде теләй.* Б. Бикбай. *Варшау калаһы таш кала, күп калаға баш кала; герман тиғән йөҙө кара шул Варшауға хаслана.* (Халык йырынан).

**2.** *кусм.* Үс иткәндәй кыҙышып каҙалыу; канығыу. *Эшкә хасланыу.*

**ХАСЛАУ** [1] *к.* Кем йәки нимәгәлер хас үҙенсәлектәрҙе иҫләп эшләү, йәтешләү; махсус тәғәйенләү. *Ау бәйләүгә хаслап эшләнгән энә.* ■ *«Белем» журналы укытыусыларға ғына хаслап сығарылмай.., дөйөм бер журнал булып сығып килде.* Т. Йәнәби.

**ХАСЛАУ** [2] *к.* Нимәгәлер комарланып, хасланып тотоноу. *Гәүһәр тарткылашты, бирешмәҫкә тырышты. Ләкин хаслап алған катын-кыҙ төркөмөнән дә яманырак нәмә бармы ни был донъяла.* И. Ғиззәтуллин.

**ХАСЛАШЫУ** *к. кар.* **хасланыу.** *Хаслашып йөрөү. Эшкә хаслашып тотоноу.*

**ХАСЛЫК** *и.* Кемгәлер каршы йүнәлтелгән яуыз уй, яуыз эш; дошманлык, үслек. *Хаслык уйлау. Хаслык эшләү.* ■ *Беҙгә хаслык уйлаған Тәфтиләү бер михнәт тә күрмәй үлмәһен* (Халык йырынан).

□ **Хаслык итеү** яуызлык эшләү. *[Барсын:] Әллә бахырға [Ямалға] шул күл эйәһе хаслык итте инде. Барғанда арыу ғына барғайны, кайтканда арбала ятып сак кайтып йығылды.* Һ. Дәүләтшина.

**ХАС(С)** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Юғары катлам кешеһе, аристократ. *Хастар менән ғәмдәр араһын айыра торған һинме ни?* Ш. Бабич.

**ХАСТА** *и. кар.* **хәстә.**

**ХАТ** [1] *и.* **1.** Хәбәр алышыу йәки хәл белешеү өсөн кемгәлер тәғәйенләп яҙылған кағыҙ. *Рәсми хат. Һалдат хаты. Яуап хаты. Хат ташыусы. Хат алыу. Хат һалыу.* ■ *Хаттар яҙһаң йышырак яҙ, хаттар ярты күрешеү.* А. Игебаев. *Табак та ғына табак ай ак кағыҙ Буранбайҙың яҙған хаттары. Буранбайҙың яҙған хатын укып зар илай-*

ҙар ауыл карттары (Халыҡ йырынан). **Асыҡ хат** кемгәлер исемләп, матбуғатта баҫылған хат. *Редакцияға килгән хатҡа яуап итеп, газета аша һиңә асыҡ хат яҙырға булдым.* Ә. Вахитов. **Баһалы хат** хаҡ ҡуйылған хат. **Заказлы хат** почта яуаплылығына тапшырылған хат. *Хаттар ғына һалһаң, һал заказлы, заказлы ла хаттар тиҙ урай* (Халыҡ йырынан). **Исемһеҙ хат** кем яҙғаны билдәһеҙ хат. **Ябыҡ хат** 1) конвертҡа һалып айырым кешегә тәғәйенләп ебәргән хат; 2) билдәле бер төркөм кешеләр тарафынан ғына уҡылырға тейешле рәсми хат.

**2.** *иҫк.* Ниҙер яҙған рәсми ҡағыҙ. *Талаҡ хаты.* ■ *Хан тәхетенән төшкән һуң менгәне йәйҙәк ат булыр, өҫтөнән күп хат булыр* (Ҡобайырҙан).

◆ **Ҡош телендәй генә хат** бәләкәй генә хат. **Хат етәр ергә хат, ат етәр ергә ат ебәреү** төрлө яҡҡа хәбәр итеү. *Гәҙел хөкөмдән һуң хат етәр ергә хат, ат етәр ергә ат ебәреп бик күп халыҡ саҡырып, Кейеҙбай менән батшаның кесе ҡыҙына бик ҙур туй яһанылар, ти* (Әкиәттән).

**ХАТ** [2] [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Сик һыҙығы. *Хохлов ҡалған гәскәрҙәре илә башҡорттарҙың мохасара хаттарына һөжүм итте.* М. Һаҙыев.

◆ **Хаттин ашыу** саманан ашыу, сиктән сығыу. *Асыуы хаттин ашҡан.* ■ *Әсәйемдең ҡаушауы хаттин ашҡайны.— Һай аллаҡайым, бынағайыш! — тип, ул һушына килгәндәй булды.* В. Исхаков.

**ХАТА** [*ғәр.*] *и.* **1.** Иҫәпләүҙә, яҙыуҙа һ. б. кемдер тарафынан ебәрелгән яңылышлыҡ. *Орфографик хата. Хата ебәреү. Хата яһау. Яҙыуҙағы хатаны төҙәтеү. // Хата яҙыу.*

**2.** Дөрөҫ булмаған эш, ҡылыҡ, яңылыш ҡыланыш. *Эштәге хата. Үҙ хатаңды аңлау. Саҡырғанда бармай, хата эшләү. // Хата эш. // Хата аңлау.* ■ *Хата тип хатаны орма йөҙгә, хатаһыҙ бәндә булмаҫ хаҡтин үҙгә.* Аҡмулла. *Хата аҙаҡ үкендерә оҙаҡ.* М. Хәй. *[Нәзирә:] Сәйҙел иптәш, уйығыҙ хата кеше турында.* Ғ. Сәләм. *Бар тормошо уның хата булды, ялған пәйғәмбәргә табынды.* М. Кәрим. *Йәшәмәгән генә яңылышмаҫ, юҡ-бар уйҙар башҡа тулмаһын. Хаталар ҙа булыр тормошоңда, тик тормошоң хата булмаһын.* Р. Ғарипов.

**ХАТАЛАНЫУ** *ҡ.* Хата (2 мәғ.) ебәреү, хата эшләү. *Буш һүҙгә ышанып, хаталаныу.* ■ *[Инспектор:] Һеҙ хаталанаһығыҙ бит, мин батрактар союзынан килгән кеше түгел.* Т. Йәнәби. *Мөхәббәттә ҡай саҡ хаталандым, хыянатһыҙ булдым дуҫлыҡта.* Ғ. Рамазанов.

**ХАТАЛЫҠ** *и.* Яңылыш, хата эш; яңылышлыҡ. *Хаталыҡ эшләү.* ■ *[Фәхри:] Хаталыҡ булған, кисерегеҙ мине, иптәштәр.* Б. Бикбай.

□ **Хаталыҡ итеү** хата эш эшләү; хата ебәреү. *Төндө юлға сығып хаталыҡ иттек.*

**ХАТИМ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Мисәт, мөһөр.

**2.** *дини* Ҡөрьәнде баштан аҙағынаса уҡып сыҡҡан кеше.

**ХАТИП** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Вәғәз һөйләүсе.

**2.** Телмәр тотоуға оҫта кеше; оратор. *Хатиптар һөйләй, эштәрен көйләй.* Д. Юлтый.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ХАТИПЛЫҠ** *иҫк.* **хатиплыҡ итеү** телмәр тотоу, телмәр һөйләү. *[Казан шәкерттәре] йәмғиәттәрҙә вә башҡа урындарҙа хәл ҡәҙәре ижтиһад итеп, хатиплыҡ итеп кем икәнлектәрен татар ағаларына күрһәттеләр.* М. Ғафури.

**ХАТЛАШЫУ** *ҡ.* Хат алышыу, хат яҙышыу. *Беҙ йыш ҡына хатлашып торабыҙ, бер-беребеҙгә китаптар ебәрәбеҙ.* Ж. Кейекбаев.

**ХАТТА** *киҫ.* **1.** Һүҙ йәки һүҙбәйләнештең мәғәнәһенә баҫым яһап, көсәйтеү өсөн ҡулланыла. *Сәғиҙә хатта бер ыңғайҙан Өфөгә китергә булғайны, тик Гөлнур .. кәңәш бирмәне.* М. Тажи. *Һәр бер бите, хатта һәр бер юлы, уйҙарымдай таныш китаптың.* Х. Ҡунаҡбай.

**2.** *терк. мәғ.* Һөйләм киҫәктәрен, шулай уҡ һөйләмдәрҙе теркәү өсөн ҡулланыла. *Мин ҡапыл туҡталдым, хатта бер-ике аҙым артҡа сиктем.* Д. Юлтый. *Улар [сәскәләр] шул хәтле тере, хатта уларҙың хуш еҫтәре танауға бәрелеп торған һымаҡ.* З. Биишева.

**3.** *р. мәғ.* Үтә ныҡ, бик. *Хатта асыҡты. Хатта арыны.* ■ *Хатта ҡурҡҡан инде Мәғүзә, хатта ҡурҡҡан, саҡ йөрәге ярылмаған.* Б. Бикбай.

**ХАТТАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Матур, оҫта итеп яҙыусы; каллиграф. *Ниндәйҙер хаттатың оҫта ҡулдары менән күсереп яҙылған мәжмуға.* Ғ. Ибраһимов.

**ХАТ-ХӘБӘР** *и. йыйн.* Хат йәки башҡа юл менән ишеттерелгән һүҙ, хәбәр. *Хат-хәбәре юҡ.* ■ *Миңлебайҙың фронттан хат-хәбәре һирәк-һаяҡ ҡына килеп торҙо.* В. Исхаков.

**ХАТҺЫҘ** *с. диал.* Ҡаты бәғерле, яуыз. *Хатһыҙ кеше.*

**ХАУАС** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Айырым үҙенсәлектәр.

**2.** Юғары ҡатлам кешеләре; аҡһөйәктәр; аристократия. *Тупсыбаш .. булды баш, күҙ өҫтөнә ҡаш, хастар өҫтөндә хауас!* Ш. Бабич.

**3.** Дәрәжәһе ҙур кешене оҙатып йөрөгән кешеләр төркөмө; свита. *Үҙенә күрә абруй ҡаҙаныу.., ҙур түрәләр араһына ҡыҫылып йөрөү, губернатор хауасына инеү — бигерәк тә кешенең йәш сағында бик мауыҡтырғыс нәмә.* Ғ. Ибраһимов.

**ХАУЫЗ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Яһалма күл; һыу йыйылып ятҡан соҡор. *Хауыз кәүсәр шишмәһе өҫтөнән иҫкән ел кеүек.* Ш. Бабич.

**ХАФА** [*фарс.*] *и.* Хәүефләнеү, борсолоу, ҡайғырыу хисе. *Хафаға һалыу. Хафаға төшөү.* ■ *Хәлимә, ошо уйҙарға төшөп, тәрән хафаға батты.* Һ. Дәүләтшина. *Юлдарыма хафа менән бағам, еткән саҡта ғүмер уртаһы.* Р. Бикбаев.

**ХАФАЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Күңел тыныслығын боҙоп, уйланырға мәжбүр итеү; хафаға ҡалдырыу; борсолдороу. *Былай ғына булһа [ауырымағас], мине хафаландырып, яҫтыҡҡа ҡапланып ятма.* Ш. Янбаев.

**ХАФАЛАНЫУ** *ҡ.* Күңел тыныслығын юғалтыу; хафаға ҡалыу; борсолоу. *Хафаланып йөрөү.* ■ *Арыҫлангәленән тәүҙәрәк хат-хәбәр килмәгәс, бик хафаланғайнылар, һуңынан ике шатлыҡ бер юлы килде.* Р. Солтангәрәев. *Фәһимдең хәле артыҡ хафаланырлыҡ түгел.* Ф. Иҫәнғолов.

**ХАФАЛАНЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **хафаланыу.**

**ХАФАЛАУ** *ҡ.* Күңелгә хафа, шом һалыу; тыныслыҡты уятыу; борсоу.

**ХАФАЛЫ** *с.* Тыныcһыҙ, борсоулы. *Ҡапыл ауыр ҡүтәреүҙән биле биртенеп, ҡуҙғала алмай ятҡан Юламан ҡарттың күңеленә хафалы уйҙар килә.* З. Биишева.

**ХАФИЗ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк.* Һаҡта торған кеше; һаҡсы.

**2.** (*йәки* **ҡөрьән хафиз**) *дини* Ҡөрьәнде яттан белеүсе. *«Ҡарғалы мәҙрәсәһенә ҡасып тугыҙ йыл тигәндә хафиз булып ҡайттым»,— тип уҡыны Шәмси.* Ғ. Хәйри.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ХА-ХА, ха-ха-ха** *ымл.* Ҡысҡырып көлгәндә белдергәндә әйтелә. *[Сәйҙел:] Ха-ха-ха! Зәйнәп, һин кәзәне тағы һыйыр менән сағыштыр.* Ғ. Сәләм.

**ХАХЫЛДАҠ** *с. һөйл.* Көлөргә яратҡан; көләгәс. *Хахылдаҡ ҡыҙ. Хахылдаҡ булыу.*

**ХАХЫЛДАУ** *ҡ.* Ныҡ ҡысҡырып, ихахайлап көлөү. *Хахылдап көлөү.* ■ *Был мажараны тыңлап торған аҡ офицер Филипп Степанович бот сабып хахылдап көлөргә тотондо.* Һ. Дәүләтшина. *Егеттәр баштағы әҙәплелектәрен юғалттылар. Әсә аңламаһын өсөн, яртылаш башҡортса, яртылаш урыҫса анекдоттар һөйләнеләр, хахылдап көлдөләр.* Ф. Иҫәнғолов.

**ХАХЫЛДАШЫУ** *ҡ. кит.* Хахылдау. *Ирҙәр хахылдашып көлөштөләр.*

**ХАЧ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит. ҡар.* **тәре**[1]. *Дин әһеленең изге китаптары мәғбәдтәре, алтын хачтары, яҙылып биҙәкләнгән ләүхелмәхфуз» таҡтаһын емереп ватабыҙ!* М. Ғафури.

**ХАША** [*ғәр.*] *ымл. иҫк. кит.* Ризаһыҙлыҡты, кире ҡаҡҡанды белдергәндә әйтелә. *Хәҙрәт Ярулла Муса башына төштө ғаса, Байрашевтарға ҡушылған ул, тиҙәр. Булмаҫ! Хаша!* Ш. Бабич.

**ХАШАРАТ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **хәшәрәт.**

**ХАШИӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ниҙеңдер асылын төшөндөрөп, мәғәнәһен асып биргән һүҙ йәки яҙма; аңлатма./ Китап йәки хат ситендәге яҙма.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

□ **Хашиә итеү** ниҙеңдер асылын, мәғәнәһен асып биреү, төшөндөрөү; аңлатма биреү. *[Уның Миршәрифтең] улы Мирсәйет ғалим һәм фазыл әҙәм ине. Бик күп фәнгә хашиә итте.* «Башҡорт шәжә рәләре», 1960.

**ХАШШАҠ** *с.* **1.** *һөйл.* Бысраҡ, әшәке. *Өйҙәре бигерәк хашшаҡ.*

**2.** *ҡусм.* Үҙенең тәртибе менән кеше ерәндерерлек, хәшәрәт. *Хашшаҡ кеше. Хашшаҡ булыу.* / Әрләгәндә әйтелә.

**ХАЯ** [*ғәр.*] *и.* Ояла белеү хисе; оят. *Хаяны юғалтыу.*

**ХАЯЛЫ** *с.* Ояла белгән; әҙәпле. *Хаялы ҡатын. Хаялы булыу.*

**ХАЯТ** [*ғәр.*] *и. кит.* **1.** Кешелек донъяһы, тормош. *Кеше рухы өсөн кәрәк булған бар нәмә бар ошо хаятта.* С. Кулибай. *Барабыҙ шатланып яҡты хаятҡа, сәғәҙәт, йәм табарбыҙ шул хаятта.* Ш. Фидаи. *Мин барешмәм уҫал тормошҡа ла, юлым яҡты күңелем саф минең, шуның менән алғы хаятым да булыр, тип ышанам, аҡ минең.* Т. Йәнәби.

**2.** Һәр төрлө йән эйәләре; тереклек. *Килеп туҡтағанға байтаҡ булды, ҡаҙаҡ ҡыҙы әле күренмәй. Тик ҡурала малдар шатырҙаша, башҡа төрлө хаят беленмәй.* Т. Йәнәби.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ХАЯҺЫҘ** *с.* **1.** Ояла, тартына белмәгән; оятһыҙ, әҙәпһеҙ. *Хаяһыҙ кеше. // Хаяһыҙ ҡыланыу.* ■ *— Былдай хаяһыҙ икәнеңде белһәм, аяҡ та атламаған булыр инем.* Н. Ҡәрип./ Әйтеүгә оят; әҙәпһеҙ. *Хаяһыҙ һүҙ. // Хаяһыҙ һөйләшеү.*

**2.** *р. мәғ.* Аяуһыҙ. *Эй малай, саҡ шуҡлығыңа барып, сәскәләргә булдың хаяһыҙ, һин уларҙы өҙҙөң, тапап киттең һәм өләшеп сыҡтың самаһыҙ.* В. Әхмәҙиев.

**ХЕ́ДЕР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и. а. х.* Иген ура торған комбайндың урғысы. *Хедерҙы ҡүтәреү. Хедерҙы төшөрөү.* ■ *Тук башаҡтар хедер полотноһына ауып торҙолар, уларҙы барабан үҙенә һурҙы.* Ә. Атнабаев.

**ХЕҘМӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кешенең билдәле бер маҡсатҡа йүнәлтелгән эшмәкәрлеге; эш. *Ижтимағи хеҙмәт. Физик хеҙмәт. Аҡыл хеҙмәте. Ҡул хеҙмәте. Хеҙмәт алдынғыһы. Хеҙмәт ҡоралы.* ■ *[Вәлишин:] Хеҙмәт беҙҙә генә намыҫҡа һәм геройлыҡ эшенә әйләнде. Кем хеҙмәтен намыҫ менән үтәй, ҡайҙа эшләмәһен, хур түгел, доярканан академикҡаса орден бирәп, ҙурлай беҙҙең ил.* Ғ. Сәләм. *Ҡош һауала, ат тауҙа, кеше хеҙмәттә һынала.* А. Игебаев. **Ҡара хеҙмәт** ҡул көсө менән башҡарылған ауыр эш. *[Ғәйшә:] Берҙән-бер ҡыҙымды, тием. Ҡара хеҙмәткә өйрәнгәнме ни һуң ул. Май эсендәге бөйөр генә кеүек бит әле ул.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Рәсми урындағы эш һәм эш урыны; вазифа. *Хеҙмәт урыны. Хеҙмәт кешеһе.* ■ *Кинйә Арҫланов Башҡортостандың Нуғай юлы Бошман-Ҡыпсаҡ волосында старшиналыҡ хеҙмәтен үтәгән кеше булған.* Ғ. Ибраһимов./ Ниҙеңдер үтәгән эше, функцияһы. *Ултырғыс хеҙмәтен үтәгән йәшник. Комбайндың хеҙмәте иген урыуҙан ғибәрәт.*

**3.** Кем йәки ниҙер файҙаһына ярҙам рәүешендә башҡарған эш. *Хеҙмәтеңде онотмам.* ■ *[Айбулат:] Хеҙмәттәремде иҫәпләгән саҡта, минең дә һеҙҙән аяған эшем юҡ бит.* Һ. Дәүләтшина. *Егет кенә булһаң, хеҙмәт ҡурһәт, исемдәрең ҡалыр илеңдә* (Халыҡ йырынан).

**4.** *иҫк.* Ниндәйҙер бер илдең ҡораллы көстәре; армия. *Хеҙмәткә алыныу. Хеҙмәттән ҡайтыу.* ■ *[Ябағаев:] Мин һалдатҡа алынманым, ҡаралдым, әммә алынманым, хеҙмәткә яраҡлы тапманылар.* М. Кәрим.

**5.** Махсус эш өлкәһен башҡарған бүлек йәки ойошма. *Ғәскәрҙәге медицина хеҙмәте. Элемтә хеҙмәте. Һауа хеҙмәте. Ваҡыт хеҙмәте.* **Линия хеҙмәте** *тар.* сик буйындағы хеҙмәт. *Ук-һаҙағы, үҙенең аты-туны менән ул яҡтың [Ҡәһтә ягының] ир-егеттәре лә империя сиктәрен һаҡлау буйынса линия хеҙмәтендә йөрөргә мәжбүр булған.* Р. Шәкүров.

**6.** Маҡсатлы эшмәкәрлек һөҙөмтәһе булараҡ кемдер тарафынан яҙылған нәмә; эш, әҫәр. *Ғилми хеҙмәт. Баҫма хеҙмәт./* Үҙе эйәреп килгән һүҙҙәр алдында килеп ошо эшмәкәрлеккә, эшкә бәйләнешле булғанды, уға нигеҙләнгәнлекте белдерә. *Хеҙмәт дисциплинаһы. Хеҙмәт ҡурһәтке-*

*се. Хеҙмәт сығымдары. Хеҙмәт тәрбиәһе. Хеҙмәт мәктәбе.*

□ **Хеҙмәт итеү** 1) ниндәйҙер бер өлкәлә эшләү. *Ауыл хужалығы өлкәһендә хеҙмәт итеү;* 2) хәрби хеҙмәттә булыу. *Егет кенә сакта әрмеләрҙә хеҙмәт итеү тигән йола бар* (Халыҡ йырынан); 3) ялсы, хеҙмәтсе булыу. *Әсәйем .. кейәүгә сыкканса кешелә хеҙмәт иткән.* Т. Йәнәби; 4) ниндәйҙер вазифаны башҡарыу. *Фольклор синфи көрәш, синфи тәрбиә ҡоралы булып хеҙмәт иткән.* Ғ. Амантай.

♦ **Хеҙмәт кенәгәһе** кешенең эшләгән урыны, стажы, алған наградалары һ. б. иҫкәрмәләр яҙылып барған документ. **Хеҙмәт көнө** колхоз доходында колхозсының хеҙмәт өлөшөн билдәләп, иҫәпкә алыу берәмеге (1966 йылға тиклем ҡулланыла). **Хеҙмәтте фәнни ойоштороу** берәй эште фән яңылыҡтарына таянып алып барыу. **Хеҙмәтен үтәү** нимәлер урынына йөрөү, ҡулланылыу. *Таяу хеҙмәтен үтәгән ағас.* ■ *Тәҙрә хеҙмәтен үтәгән уҫ аяһындай ғына тишек.* Т. Хәйбуллин.

● *Хеҙмәт ҡанды тарата, һаулыҡ хеҙмәт ярата.* Әйтем. *Хеҙмәт төбө хазина.* Мәҡәл. *Хеҙмәт төбө хөрмәт.* Мәҡәл. *Хеҙмәте юктың хөрмәте юк.* Мәҡәл.

**ХЕҘМӘТКӘР** [*ғәр.* + фарс.] *и.* Берәй учреждениела, ойошмала эшләгән кеше. *Ғилми хеҙмәткәр. Хәрби хеҙмәткәр.* ■ *Бында [магазинда] бөтәһе һигеҙ хеҙмәткәр, минең менән туғыҙ булабыҙ.* С. Агиш./ Берәй ваҡытлы йәки күп томлы баҫмаҡың даими авторҙарының, төҙөүселәренең береһе. *Журналдың хеҙмәткәре.*

**ХЕҘМӘТЛӘНДЕРЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **хеҙмәтләндереү.**

**ХЕҘМӘТЛӘНДЕРЕҮ** *к.* **1.** Кем йәки нимәләрҙер ихтыяжын, йомошон башҡарыу. *Көнкүреш яғынан хеҙмәтләндереү. Ауылды хеҙмәтләндереү.* ■ *Ленин исемендәге колхозды хеҙмәтләндергән трактор бригадаһында йыйылыш булды.* Ә. Вәли.

**2.** Эш иттереү, эшләтеү. *Электр станцияһын хеҙмәтләндереү.*

♦ **Үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү** үҙенең кәрәген үҙе ҡәнәғәтләндереү. *Ашхана үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү тәртибе менән эшләй.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 11 февраль.

**ХЕҘМӘТСЕ** *и.* **1.** Революцияға тиклем байға хеҙмәт иткән кеше; ялсы. *Хеҙмәтсе булып тороу. Хеҙмәтсе булып ялланыу.* // *Хеҙмәтсе малай.* ■ *Әбүбәкер ҡарт, яңы хеҙмәтсеһенең уңғанлығын күреп, эстән бик шатланһа ла, тыштан йөйөн дә белдермәне.* Р. Ғабдрахманов. *Унда хеҙмәтсе ҡыҙ Лина төрлө тәмле еҫ сығарып төшкө аш әҙерләй.* һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Кем йәки нимәнеңдер мәнфәғәтен ҡайғыртҡан, уның ихтыяжын ҡәнәғәтләндергән кеше. *Ватан хеҙмәтсеһе. Фән хеҙмәтсеһе.*

**ХЕҘМӘТСЕЛЕК** *и.* Ялсылыҡ. *Хеҙмәтселеккә инеү. Хеҙмәтселектә тороу.*

**ХЕҘМӘТСӘН** *с.* Эшләгән, хеҙмәт иткән. *Хеҙмәтсән кеше. Хеҙмәтсән халыҡ.* ■ *Беҙҙә башҡорт хеҙмәтсәндәре массаһы араһында иҫ китерлек бай фольклор бар.* Ғ. Амантай. *Ынтыл, хеҙмәтсән, баҫ бергә, ҡалма! Дуҫлыҡ, Ғәҙеллек һәм Хеҙмәт, алға!* Ғ. Әмири.

**ХЕҘМӘТТӘШ** *и.* Бер эштә хеҙмәт иткән кешеләр. *Хеҙмәттәштәр йыйылышы.* // *Хеҙмәттәш кешеләр.* ■ *Аҡбирҙе олатайығыҙҙың атаһы, минең ҡайным бахыр менән хеҙмәттәш булғандар.* З. Ураҡсин.

**ХЕҘМӘТТӘШЛЕК** *и.* Үҙ-ара ярҙам итеүгә нигеҙләнгән берҙәмлек. *Милләттәр араһындағы хеҙмәттәшлек. Инженерҙар менән эшселәр араһындағы хеҙмәттәшлек. Культура өлкәһендәге хеҙмәттәшлек.*

□ **Хеҙмәттәшлек итеү** бергәләшеп бер төрлө эштә ҡатнашыу.

**ХЕК** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Трескалар ғаиләһенә ҡарған йомро кәүҙәле диңгеҙ балығы.

**ХЕ-ХЕ, хе-хе-хе** *ымл.* Мыҫкыл менән әкрен генә көлгәндә белдергәндә әйтелә. *[Ғариф:] Хе-хе, .. ул да әйтте һүҙ.* Б. Бикбай.

**ХИБАЛӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тоҙаҡ, ау. *Хибалә ҡороу.* ■ *Дошмандар хибаләне һалып ҡарай — турғайҙың тоҙағына ыласын төшмәй.* Аҡмулла.

**ХИБЕС** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Төрмә, зиндан. *Хибескә ябыу. Хибестә ултырыу.* ■ *[Лоҡман кантон — Әбрәй батырға:] Йыйындағы батырҙарҙың булғанын да йыкһаң, хибестән ҡотҡарам, өҫтәүенә бер йылҡы орлоғо нәҙер итәм.* Ж. Кейекбаев.

□ **Хибес итеү** кешене һаҡ аҫтына алыу, төрмәгә ултыртыу. *Батша төшөрөлгән, министрҙар хибес ителгән, тигән хәбәргә Вәли ағай башта ышанманы.* М. Ғафури.

**ХИБЕСЛЕК** *и. иҫк.* Тотҡонлоҡ. *Совет власы булмаһа, беҙҙең ғүмер хибеслектә йөрөп үтер ине.* Т. Баишев.

**ХИЖАБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡатын-ҡыҙҙың йөҙөн ҡаплай торған пәрҙә; бөркәнсек. *Хижаблы ҡыҙ. Хижаб бөркәнеү.* ■ *Йөҙҙәрен минән йәшермәйҙәр, былар ҙа [китапта] юк хижаб.* М. Ғафури.

**ХИЗАН** [*фарс.*] *и. тар.* Бер урындан икенсе урынға ҡасып киткән крәҫтиән.

**ХИКМӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ғәжәп ҙур аҡыл, тәрән белем. *Хикмәт эйәһе.* ■ *Мәғрифәт, хикмәт шәмен ҡабыҙып, йә әле һеҙ [ҡатын-ҡыҙ] балҡығыҙ.* Б. Мирзанов.

**2.** Ҡыҫҡа ғына ҡыҙыҡлы хикәйә, ғибрәтле һүҙ. *Хикмәт һөйләү.* ■*[Ишбикә әбей:] — Әй, балалар, беҙҙең бабай станциянан бер хикмәт ишетеп ҡайтҡан әле, хәйерлегә булһа, ярар ине.* З. Ураҡсин. *Шепшә — кешенең йәнен көйҙөрә, шырмый — күңелде күтәрә. Улар тел төбө менән, бер хикмәт сығарып һөйләйҙәр.* Ә. Вахитов.

**3.** Нимәнеңдер асылын тәшкил иткән эске мәғәнә. *Хикмәт йәшлектә түгел, йөрәктә.* Б. Бикбай. / Берәй нәмәнең төбөндә ятҡан йәшерен сәбәп; сер, ғилләә. *[Миңнегәле:] Власть харап итә уны. Күтәрә алмай. Бына уның хикмәте ҡайҙа.* Х. Ғиләжев. *Ул [Ярулла] ниндәйҙер хикмәт менән һикереп торҙо ла, ҡулындағы гранатаһын дошманға ырғытты.* Ә. Ихсан.

**4.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

♦ **Был ни (йәки бына) хикмәт** ғәжәпкә ҡалғанда, аптырағанда әйтелә. *Был ни хикмәт! Үҙ күҙҙәремә үҙем ышанмайым. Имән төбөндә*

*Кинйәбулат бабай салғы сүкеп ултыра.* Ф. Әсәнов.

● *Астың күҙе икмәктә, түктың күҙе хикмәттә.* Әйтем.

**ХИКМӘТЛЕ** *с.* **1.** Ҡапыл ғына аңлай алмаҫлыҡ йәшерен мәғәнәле, серле, тылсымлы. *Хикмәтле йоҙаҡ.* ■ *Әскән һыуы сихәтле, әйткән һүҙе хикмәтле.* Х. Кәрим.

**2.** *күсм.* Бик мәрәкә, ҡыҙыҡ; мажаралы. *Хикмәтле әкиәт. Хикмәтле тамаша.* ■ *Их, хикмәтле ул такси шоферының эше. Бер көн эсендә кемдер менән генә осрашырға, ниндәй генә ваҡиғаларҙың шаһиты булырға тура килмәй уға.* Р. Ғабдрахманов.

**ХИКМӘТЛӘҮ** *к.* Йәшерен, тәрән мәғәнә биреү, хикмәтле, серле итеү. *Көнсығыш хакимдары шикелле Батырша хәкикәтте әкиәт-легенда менән хикмәтләп ныгытмаксы.* Ғ. Хөсәйенов.

**ХИКӘЙӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Тормоштағы бер ваҡиғаға арналған бәләкәй сәсмә әҙәби әҫәр. *Балалар өсөн яҙылған хикәйә. Юмористик хикәйә.* ■ *Мин бер хикәйә уҡығайным.. Унда диңгеҙ буйында кояш байып барғаны тасуир ителгән.* С. Агиш.

**2.** Күргән-белгән тураһында һөйләнгән хәбәр. *Герман һуғышы ваҡытында, йәғни мәҫәләне, беренсе донъя һуғышы мәлендә фронтта осраштыҡ беҙ уның менән,— тип башлап китте Хәсбулат олатай үҙенең хикмәтле хикәйәһен.* З. Биишева.

□ **Хикәйә итеү** тасуир итеп һөйләү йәки яҙыу. *Австрия фронтындағы ауылдашҡа хат яҙабыҙ. Хатта фронт хәлдәрен хикәйә итәбеҙ.* Д. Юлтый.

**ХИКӘЙӘЛӘҮ** *к.* **1.** Тормоштағы ваҡиғаларҙы, эш-хәрәкәтте эҙмә-эҙлекле итеп һөйләп биреү, хикәйә итеү. *«Караунһарай» йыры тарихта ысынлап та булып үткән ваҡиға тураһында хикәйәләй.* С. Галин.

**2.** Тасуир итеү; һүрәтләү. *Поэма жанры өсөн ваҡиғаларҙы лиро-эпик планда хикәйәләү характерлы.* Ғ. Хөсәйенов.

**ХИКӘЙӘСЕ** *и.* **1.** Хикәйә яҙыусы; хикәйә яҙған кеше. *Хикәйәләрҙең күләме ҙур булмау хикәйәселәргә көндөң иң үҙәк мәсьәләләренә тиҙ яуап бирергә мөмкинлек тыуҙыра.* Ә. Вәли.

**2.** Оҫта хикәйә итеүсе, оҫта һөйләүсе.

**ХИКӘЙӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Легендаларға нигеҙләп яҙылған әҙәби әҫәр. *Лирик хикәйәт.* ■ *[Йыйынтыҡта] «Һөнәрсе менән Өйрәнсек», «Мөхәббәт һәм нәфрәт» һымаҡ ысын мәғәнәһендә шиғриәтле хикәйәттәрҙә, төрлө йылдарҙа яҙылған повесть һәм хикәйәләр ҙә бар.* Р. Шәкүров. *Хикәйәттәр, ғәҙәттә, хикмәтле йөкмәтке менән характерланған берәй тарихи ваҡиғаға ҡоролған була.* К. Әхмәтйәнов.

**2.** Фантастик ваҡиғалар тураһында уйлап сығарылған эпик әҫәр; әкиәт. *[Хәсбулат:] Хикәйәтте беҙҙә кис, ай яҡтыһында, эшһеҙ саҡта ғына һөйләйҙәр.* З. Бишева.

**ХИЛАФ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Ярамай торған, килешмәгән, килешһеҙ. *Хилаф эш. Хилаф исем. Хилаф булыу.* ■ *Күрьән әйткән: «Әй, һин, бәндә, .. һын яһау хилаф мөьмингә».* Х. Ғиләжев. *Был әйткәнем китапҡа хилаф имәс.* Аҡмулла.

**2.** *р. мәғ.* Кире, ҡаршы, тиҫкәре. *Һәр кеше хәл ҡәҙәре ҡылһын инсаф, беребеҙ икенсегә төшмәй хилаф.* М. Ғафури.

□ **Хилаф итеү** (*йәки* **ҡылыу**) килешмәгән эш эшләү; зыян килтереү. *Булмаһа ла йөҙә көләс, күңеле бар эшкә ихлас, дуҫтарына итмәй хилаф.* К. Кинйәбулатова. *[Старшина — Ырыҫҡолға:] Һине үҙ кеше итеп күргәнгә генә, законға хилаф ҡылып булһа ла ҡотҡарырға булыр.* Б. Бикбай.

**ХИЛАФЛЫҠ** *и.* **1.** Килешмәгән, ярамаған эш; яңылышлыҡ, хата. *[Йыһанша] бер әҙәмдә аҙ ғына бер хилафлыҡ күрһә, уға асыуланып, дошман булып, мәжлесенә бармай.* З. Һаҙыев.

**2.** *күсм.* Зыян, зарар. *Хилафлыҡ килтереү.*

**ХИЛЕ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Арыу уҡ, күп кенә. байтаҡ. *Хиле ваҡыт үтте.* ■ *Ғәлиә лә хиле белем хасил итте.* Ә. Иҫәнбирҙин.

**ХИЛЕС** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ихлас.

**ХИЛҠӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Уратып алған тирә-яҡ; тәбиғәт. *Тирә-йүн хилҡәте.*

□ **Хилҡәт итеү** донъяға килтереү; яратыу. *Әй хоҙайым, файҙаһыҙ хилҡәт итмәнең ер, күк йөҙөн.* Я. Юмаев.

**ХИЛҮӘТ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Рәхәтлек биргән иркен, аулаҡ, хозур. *Хилүәт ер. // Хилүәт йәшәү.* ■ *[Йәйләүҙә] хилүәт донъя. Әйҙә рәхәтләнһендәр һыу инеп.* Я. Вәлиев. *Һунарсы ла бында аяҡ баҫмай, хилүәт йөрөй йәнлек, ҡошсоҡтар.* С. Кулибай. / Ығы-зығыһыҙ, шау-шыуһыҙ; тыныс. *Хилүәт көндәр.* ■ *[Ырыуҙаштар] үҙ-ара дошманлашмай, хилүәт кенә ғүмер һөрөп яталар* (Әкиәттән).

**2.** Матур, йәмле, күркәм. *Хилүәт ерҙәр.* ■ *Урманы! Һыуҙары үҙәндәре, тәбиғәте! Швейцарияң ары торһон! Ниндәй хилүәт урындар бар беҙҙең Башҡортостанда!* Ж. Кейекбаев.

**3.** *күсм.* Күңелгә ятҡан; йылы, яҡшы. *Дуҫ-иш менән ултырҙаш булһаң, хилүәт-хилүәт һүҙгә туярһың* (Халыҡ йырынан).

**4.** *и. мәғ.* Ғәжәп ҡалырлыҡ нәмә; хикмәт, мөғжизә. *Тимерләп эшләнгән һандыҡ үҙе бер хилүәт ине. Семәрләнгән был һандыҡҡа иғтибарлап ҡарауың була, тәбиғәт донъяһына сумаһың.* Ә. Вахитов.

**5.** *күсм. диал.* Аҡылға зәғиф. *Хилүәт кеше.*

**ХИЛҮӘТЛЕК** *и.* Иркенлек, рәхәтлек. *Хилүәтлектә йәшәү.*

**ХИМАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ишәк. *Һин химар тип хурлағаның заты толпар булмаһын.* Аҡмулла.

**ХИМАЯ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кемдеңдер яҡлауы, ҡурсалауы. *Химаяға инеү.* ■ *Әстән дә, тыштан да фетнәләр булғанға күрә, 1710 йылда [ҡаҙаҡтар] Россия дәүләтенең химаяһына кереү фекеренә төштөләр.* М. Һаҙыев. *Тайба әбей шунда уҡ йәш киленен химаяға алды.— Ауырлыҡта, ҡаҡҡыла үҫкән балала әҙерәк ҡырыҫлыҡ, томһалыҡ була инде.* З. Биишева.

□ **Химая итеү** (*йәки* **ҡылыу**) яҡлау, бәлә--ҡазанан һаҡлау, ҡурсалау. *Беҙ үҙебеҙҙе үҙебеҙ химая ҡылмаһаҡ, әҙәм балалары беҙгә һис бер ваҡытта шәфҡәт итәсәк түгел.* М. Ғафури.

**ХИМАЯСЫ** *и. иҫк.* Судтағы яҡлаусы, защитник. *[Прокурор ярҙамсыһы] тотлоғоп ҡуйҙы, ләкин ҡыҙарманы, сөнки залда хаким, химаясы,*

*мәгъюн һәм бер нисә офицерҙан башка кеше юк ине.* И. Насыри.

**ХЙМИК** [*рус.*] *и.* **1.** Химия буйынса белгес.

**2.** Химия промышленносында эшләгән хеҙмәткәр.

**ХИМЙК** [*рус.*] *с.* **1.** Химияға бәйләнешле, химияға мөнәсәбәтле. *Химик ысул.*

**2.** Химия тарафынан өйрәнелгән, химия өлкәһенә бәйле. *Химик элемент. Есемдәрҙең химик үҙгәреше.*

**3.** Промышленноста химия ысулдарын ҡулланыуға бәйле. *Химик ашлама.*

**4.** Химияны хәрби маҡсатта ҡулланыуға бәйле. *Химик ҡорал. Химик һуғыш.*

**ХИМИКАЛИЙ** [*рус.* химикалии] *и. махс.* Химикат.

**ХИМИКАТ** [*рус.*] *и. махс.* Һәр төрлө химик препарат. *Ағыулы химикат.*

**ХЙМИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Бер матдәнең икенсе матдәгә әүерелеү процесын, уларҙың атом төҙөлөшөн өйрәнә торған фән. *Органик химия. Органик булмаған химия. Химия белеме.*

**2.** Берәй матдәнең сифатын тәшкил иткән состав. *Ҡан химияһы. Нефть химияһы.*

**ХИМИЯЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Химия ҡаҙаныштарын халыҡ хужалығы практикаһында ҡулланыу. *Малсылыҡты химиялаштырыу.*

**ХИН** [1] [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ваҡыт, заман, саҡ. *Бәғзе хинларҙа ишетеләләр..* «Батыршаның хаты».

**ХИН** [2] [*рус.* хина] *и. ҡар.* **хина.**

**ХЙНА** [*рус.*] *и.* Аҡ онтаҡ рәүешендәге әсе дарыу (тапма ауырыуына ҡаршы ҡулланыла); хинин.

◆ **Хина ағасы** ҡабығында хина булған мәңге йәшел тропик ағас.

**ХИНЗИР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Суҫҡа. *Көн дә әсе кәбеҫтәнән аш бешә һалдат аштары. Шул кәбеҫтә һурпаһынан сыға хинзир баштары* (Бәйеттән). / Әрләгәндә әйтелә. *Баш осомда төрөктөң тал сыбығы сажлап китте: — Сис аяғың ды, хинзир! Һарыҡ аҙбарына килеп индем тип белдеңме әллә?* Ғ. Ғүмәр.

**ХИНЙН** [*рус.*] *и. ҡар.* **хина.**

**ХИРАЖ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Ҡайһы бер ислам дәүләттәрендәге мосолман булмаған кешегә һалына торған һалым.

**2.** *кусм.* Уйламағанда төшөм, мал булғанда әйтелә. *Хираждан килгән мал.*

**ХИРЕС** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Нимәгәлер йүнәлтелгән көслө теләк; нәпсе. *Эшкә хирес һалыу.*

**2.** *с. мәғ.* Нимәгәлер ныҡ әүәҫ, дәртле. *Эшкә хирес кеше.* / Мал-мөлкәткә туймаған; ҡомһоҙ, ҡомар. *Аҡсаға хирес кеше.*

● *Мөхәббәт менән хирес бер-береһенә бик ҡырыҫ.* Әйтем.

**ХИРЕСЛЕ** *с. иҫк.* Көслө теләге булған, әүәҫ, дәртле. *Уйынға хиресле бала.*

**ХИРЕСЛЕК** *и.* Көслө теләк; әүәҫлек. *Ҙур хиреслек менән эшләү.* ■ *Хәсби апайҙың ҡумыҙҙы шул хәтле оҫта уйнауы, был уйын ҡоралына хиреслеге менән минең күҙ алдымда.* Ғ. Хөсәйенов. / Ҡомһоҙлоҡ. *[Әхмәт:] Быуаттар буйы дауам иткән хосуси милекселек, хиреслек уларҙың [карттарҙың] ҡанына һеңгән.* С. Агиш.

**ХИРЕСЛӘНЕҮ** *ҡ.* Ныҡ күңел һалыу; әүәҫләнеү. *Доньяға хиресләнеү.* / Мал-мөлкәткә туймау, ҡомһоҙланыу. *Аҡсаға хиресләнеү.*

**ХИРЕСҺЕҘ** *с. иҫк.* Үҙ файҙаһын күҙәтмәгән. *Хиреснеҙ кеше.* ■ *Маяковский — халыҡ эше өсөн илһамлы, фиҙакәр, хиресһеҙ көрәшеүсе баһадир һалдат.* Ғ. Әмири.

**ХИРОМАНТИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Кеше яҙмышының алдан билдәләп ҡуйылыуы тураһында юҡ-барға ышаныуға нигеҙләнеп, устағы һыҙаттарға ҡарап, кеше киләсәгенең алдан әйтелеүе һәм характерының билдәләнеүе. *[Марина:] Мин, кешеләрҙең ус төбөндәге һыҙыҡтарына ҡарап, уларҙың яҙмыштарын һөйләйем. Был — культурный телдә хиромантия тип атала.* И. Абдуллин.

**ХИРУРГ** [*рус.*] *и.* Хирургия буйынса белгес, врач. *Хирург булып эшләү.* ■ *Хирург, ниндәй генә тәжрибәле һәм оҫта булмаһын, һәр яңы операция алдынан тулҡынланмайынса ҡала алмайҙыр ул.* Ф. Әсәнов.

**ХИРУРГИЯ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Сирҙе операция менән дауалау ысулы һәм медицинаның шул ысулды өйрәнә торған бүлеге. *Күкрәк хирургияһы. Хирургия кабинеты.*

**ХИС** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ысынбарлыҡты күңел менән һиҙеү һәләте; тойғо. *Нескә хис. Тәрән хис. Хискә бирелеү.* ■ *Гүйә мөлдөрәмә тулы хистәр йөрәкте яндырып түгелде.* Р. Ниғмәти. *Яҙ кешеләргә үҙе менән шатлыҡ, йылылыҡ, күңелдәргә дәрт, йөрәккә хис, мөхәббәт ялҡыны алып килде.* М. Тажи.

**2.** Күңелдән килгән мөнәсәбәт нигеҙендә тыуған кисереш. *Йылы хис. Мөхәббәт хисе. Шатлыҡ хисе. Ҡәрҙәшлек хисе. Туғанлыҡ хисе. Әсәлек хисе. Хис уятыу.* ■ *Иң яҡшыһы — ҡайҙа ғына барма яҡын хисле мең-мең иптәш бар.* Ғ. Сәләм. *Милли дуҫтарға йәнеңде мәңге бәйләр милли хис.* Ш. Бабич.

□ **Хис итеү** һиҙеү, тойоу. *Иркен хис итеү.* ■ *Мин үҙемде бында балалыҡҡа кире ҡайтҡан кеүек хис иттем.* Х. Ҡунаҡбай.

**ХИСАП** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ниҙеңдер берәмләп билдәләнгән һаны; иҫәп. *Һатылған тауар хисабы. Булмәләге өҫтәл хисабы. Нәмәнең хисабын белеү.*

**2.** *иҫк.* Арифметика. *Хисап дәресе. Хисап дәреслеге. Хисапҡа өйрәтеү.* ■ *Әле яҙа, әле ниҙер ҡарап ала китаптан, иртәгә бит Гөлсөмдәргә контроль эш хисаптан.* Ф. Рәхимғолова. / Мәсьәлә. *Хисап сисеү.* ■ *Зифа апай ликбезда йөрөгәндә, мин уның хисабын сығарыштым.* К. Мәргән.

**3.** Керем-сығымдарҙы иҫәпләү эше. *Хисап эшенә өйрәнеү. Хисап йөрөтөүсе.*

**4.** Ниндәйҙер бер сифат менән билдәләнгән төркөм араһы; рәт, иҫәп. *Алдынғылар хисабында йөрөү. Хисапҡа индереү. Хисаптан сығарыу. Әҙәм хисабында йөрөү.* ■ *Мин әле үҙемде бала хисабында ғына күргәс ни, был карттан йөҙөмдө йәшереп торманым.* Һ. Дәүләтшина. / *кусм.* Кем йәки ниҙеңдер ҡарамағындағы йәки эсенә ингән өлөш; иҫәп. *Кеше хисабына йәшәү. Алдағы йыл хисабына эшләү.*

**5.** Ике аралағы алыш-биреш мөнәсәбәте. *[Йыһан — Сәрүәргә:] Күңелеңә оҡшаһа ал да ҡуй, .. килешербеҙ әле, һеҙҙең менән минең арала хисап өҙөлөшөп торғаны юҡ.* Х. Ибраһимов.

**6.** Эш барышындағы һан-иҫәптәр тураһында рәсми яуап; отчёт. *Хисап биреү.*

□ **Хисап итеү** ниҙелер үҙеңсә бер төрлө уйлау, иҫәпләү. *Ҡарашыңдан хисап иттем миндә күңелең барҙыр тип* (Халыҡ йырынан).

♦ **Хисабы юҡ** бик күп, хисапһыҙ. *Урамдағы кешенең хисабы юҡ.* **Хисап биреү** аңлап баһалау. *Ҡайҙа барам — мин уға хисап бирмәйем, һаман барам.* Д. Юлтый. **Хисап көнө** *шул уҡ* **әхирәт көнө** (*ҡар.* **әхирәт** [1]).

● *Иҫәбенә күрә хисабы.* Әйтем. *Иҫәпкә кермәгән хисапҡа кермәҫ.* Әйтем.

**ХИСАПЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **хисаплау.** *Хисапланған мал.*

**ХИСАПЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **хисаплау.** *Йөҙгә тиклем хисаплатыу.*

**ХИСАПЛАУ** *ҡ.* **1.** Ниҙеңдер һанын билдәләү, иҫәбен алыу; һанау. *Аҡса хисаплау. Хисаплап иҫәбен сығарыу.* ■ *[Ғәләү:] Туҡта барлығы күпме була әле? Эм-м.. Ул күңеленән хисаплай-хисаплай, икенсе яҡҡа атланы.* Б. Бикбай.

**2.** *күсм.* Кем йәки ниҙер тип уйлау; һанау, иҫәпләү. *Яҡшы кеше тип хисаплау.* ■ *[Юлдыҡай:] Байҙы бай яклай, бейҙе бей яклай, улар ярлыны эткә хисаплай.* Х. Ғәбитов. *Бәлки һөрләгөрмөн барған юлда, нуры ҡайтыр, бәлки, күҙемдең. Үрмәләрмен.. Ләкин бер ҡасан да сүккән хисапламам теҙемде.* Х. Ғиләжев.

**ХИСАПЛАШЫУ** *ҡ.* **1.** Үҙ-ара иҫәп-хисап эшен хәл итеү. *Хисаплашыу көнө.* / *күсм.* Үс алыу, ҡон ҡайтарыу. *Хисаплашыр көн алда.*

**2.** Иғтибарға лайыҡ күреп, кем йәки ни менәндер иҫәпләшеү. *Ҡул аҫтында эшләгән йәштәр менән хисаплашыу.*

**ХИСАПЛЫ** *с.* **1.** Һаны иҫәпләнгән; һанаулы. *Хисаплы аҡса. Хисаплы көндәр.* ■ *Үткән генә гүмер ай хисаплы, ҡалған ғына гүмер ни саҡлы* (Халыҡ йырынан).

**2.** Һаҡлыҡ менән тотонған, һаҡсыл.

● *Хисаплының малы теүәл.* Әйтем.

**ХИСАПСЫ** *и.* Иҫәп-хисап эшен алып барыусы; хисап йөрөтөүсе. *Колхоз хисапсыһы. Хисапсы булып эшләү.*

**ХИСАПҺЫҘ** *с.* **1.** Һаны билдәһеҙ. *Хисапһыҙ мал. Хисапһыҙ аҡса.* / *күсм.* Һанап бөткөһөҙ, бик күп; иҫәпһеҙ. *[Һуғышта] һәр ике яҡтан хисапһыҙ күп кеше ҡырылды, ти* (Әкиәттән).

**2.** Иҫәп менән эш итмәгән, иҫәп-хисап белмәгән.

● *Хисапһыҙҙан тоҙ алма, иҫәүәндән ҡыҙ алма.* Әйтем.

**ХИСЛЕ** *с.* Хискә бирелеүсән, хискә бай. *Нескә хисле кеше.*

**ХИСЛЕЛЕК** *и.* Нескә хистәргә бирелеү сифаты. *Моңдар, моңдар, тормош һуҡмағымда күп кисерҙем һеҙҙе йөрәктән. Һеҙ булдығыҙ мине кешелеккә, хислелеккә, йырға өйрәткән.* Й. Солтанов.

**ХИСЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Хис менән әҫәрләндереү. *[Яҙ] бар мөхитте сафландыра, күңелебеҙҙе хисләндерә, тойғоларҙы яңырта ла яңы өмөттәр уята.* «Ағиҙел», 1980, № 5.

**ХИСЛӘНЕҮ** *ҡ.* Хис менән әҫәрләнеү, хискә бирелеү. *Хисләнеп йырлау. Хисләнеп уртырыу.*

**ХИССИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Хискә (1 мәғ.) бәйле. *Шиғри ижад — ул хисси образдарҙы һүҙ ҡалыбына һуғыу, һүҙҙә уларҙы матурлап бирә белеүҙән тора.* И. Насыри.

**ХИССИӘТ** [*ғәр.*] *и.* Күп төрлө хистәр. *Әйе, тып-тын, моңһоу йәйге таңда хиссиәттән уйға талдым мин. Тормош диңгеҙенең серен эҙләп, тәрән уйға сумып ҡалдым мин.* Ғ. Амантай.

**ХИССӘН** *с.* Хискә бай, хискә тиҙ бирелеүсән. *Хиссән кеше. Хиссән булыу.* ■ *Муса Хөрмәтов менән беҙ ауыл хужалығы алдынғыларының район кәңәшмәһендә ҡатнаштыҡ. Ғәжәп хиссән, асыҡ кеше булып сыҡты ул.* Ғ. Лоҡманов.

**ХИСҺЕҘ** *с.* Хисе булмаған, бер нәмәгә лә иҫе китмәй торған, моңһоҙ. *Хисһеҙ кеше. Хисһеҙ булыу.*

**ХИТАП** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Халыҡҡа йүнәлтелгән һүҙ, телмәр, мөрәжәғәт. *Бүгәсәү тигән бер батыр .. халыҡҡа оран ташлаған, ялпыға хитап ташлаған. Тауҙарҙы үткән был хитап, һыуҙарҙы кискән был хитап.* Салауат Юлаев.

□ **Хитап итеү** (*йәки* **ҡылыу**) өндәшеү, мөрәжәғәт итеү. *Быны һеҙгә беренсе тапҡыр булараҡ һөйөклө, тип хитап итәм.* М. Ғафури.

♦ **Көйлө хитап** көйләп уҡылған өндәү һүҙе. *Ташҡа баҫҡан көйлө хитап кеүек .. Бигәрәк килештереп сығарғанһың бәйетеңде! — тип һоҡланды Гөлйөҙөм, Сәлимәне бер аҙ тынысландыра төшкәс.* Ф. Иҫәнғолов.

**ХИТАПНАМА** [*ғәр.* + *фарс.*] *и. иҫк.* Халыҡ өсөн яҙылған өндәмә; мөрәжәғәт. *Хитапнама сығарыу. Хитапнама таратыу.* ■ *Ағас ҡапҡаға аҡтар тарафынан йәбештерелгән хитапнама әле булһа алынмаған.* Б. Хәсән.

**ХИТИН** [*рус.*] *и. биол.* Бөжәктәрҙең тышҡы ҡатламында, ҡыҫала һымаҡтар һәм быуынтыҡ аяҡлылар скелетында, шулай уҡ бәшмәк бактериялар тиресәһендә була торған ҡатмарлы углеводтар төркөмөнә ҡараған органик матдә. *Хитин ҡатламы.*

**ХИТЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** *йөкм. ҡар.* **хитлау.**

**2.** *һөйл.* Төрлөсә итеп эшләү, ҡыландырыу. *[Барый:] Беҙ торған ерҙе дача тиҙәр. [Унда] Ике ҡатлы, семәрле тәҙрәләр менән хитландырып бөткән бер ҙур йорт бар.* Б. Бикбай.

**ХИТЛАНЫУ** *ҡ.* Ыҙа сигеү; интегеү, яфаланыу. *Хитланып йәшәү.* ■ *[Гөлйөҙөм:] һәнәккә элерлек тә бесән — һалам килтерелмәгән, юл өҙөлөп китһә; йылдағыса хитланырбыҙ әле.* Я. Вәлиев.

**ХИТЛАУ** *ҡ.* **1.** Ыҙа сиктереү; интектереү, яфалау. *Бикле тотоп хитлау.* ■ *[Йәш ҡатын:] Аллам һаҡлаһын, һыйыр һауам тип, яланға барып йөрөйөммө.. Бер генә һыйырыңды ла тота алмаҫһың. Күгәүен хитлап бөтөр.* Р. Низамов.

**2.** *һөйл.* Ыуаҡ-төйәк эш менән булышыу; мәшәҡәтләнеү. *Иң элек кәртә башынан бер кубәләй бесән төшөрөп, ишек алдына өйҙөләр. Булатҡа балалар уйыны һымаҡ тойолдо был ҡыланыш һәм ул: — Нимә хитлайбыҙ? — тип бышылданы.* Б. Бикбай.

**ХИТЛАШЫУ** *к.* Ыҙаланып тырышыу; мәшәҡәтләнеү. *Макарка дуҫым хитлаша торғас, мине русса хәреф танырға өйрәтте.* Б. Бикбай.

**ХИТЛЫ** *с.* Ҡыйын, ауыр, мәшәҡәтле. *Хитлы эш. Хитлы булыу.*

**ХИТЛЫҠ** *и.* **1.** Баштан кисергән ыҙа, яфа. *Хитлыҡ менән килеп етеү. Тормошта күргән хитлыҡ.*

**2.** *һөйл.* Хәйлә, мутлыҡ. *Хитлыҡ күрһәтеү.* ■ *Ләкин ҡарт бүре, атаһы, бирешергә теләмәй, улының хитлығы тураһында земский башлығына һөйләй, .. Шәүәлиҙе, һалдатҡа барыуҙан баш тартыуҙа гәйепләп, һөргөнгә ебәрәләр.* Б. Бикбай.

**ХИФЗЕ-СИХӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тышҡы шарттарҙың кеше һаулығына яһаған тәьҫирен һәм һаулыҡ һаҡлау сараларын өйрәнә торған фән; гигиена.

**ХИ-ХИ-ХИ** *ымл.* Нәҙәк тауыш менән иләп кенә көлгәндә белдергәндә әйтелә. *[Саҡай:] Түйгән ерҙән тыуған ер яҡшы, тигәндәр, хи-хи-хи.* Б. Бикбай.

**ХИХЫЛДАУ** *к.* Әкрен генә көлөү. *Хихылдап көлөү.* ■ *Хөснөлхаҡ үтә яһалма тауыш менән хихылдап көлөп ебәрҙе.— Хи-хи-хи! Ну үҙең бер ҡатлы кеше лә икәнһең һин, Закир ҡустым.* З. Биишева.

**ХИШЫМ** *и.* Шаярып, ҡыланып йөрөгән кеше; бигәләш.

**ХЛОР** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Химик элемент, һарғылт йәшел төҫтәге әсе еҫле газ (техникала, санитарияла ҡулланыла).

**ХЛОРЕЛЛА** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Составында аҡһым һәм һәр төрлө май матдәләре булған бер күҙәнәкле йәшел ылымыҡ.

**ХЛОРИД** [*рус.*] *и.* Хлорҙың башҡа элементтар менән химик берләшмәһе. *Тәбиғи хлорид. Натрий хлориды* (аш тоҙо).

**ХЛОРИТ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* **1.** Күп кенә тау тоҡомдары составына ингән йәшкелт төҫтәге йылтырған һымаҡ минералдар төркөмө.

**2.** Хлор кислотаһының тоҙо.

**ХЛОРЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **хлорлау.** *Хлорланған һыу.*

**ХЛОРЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **хлорлау.** *Һыуҙы хлорлатыу.*

**ХЛОРЛАУ** *к.* Һыуға хлор һалып, дезинфекция яһау. *Һыуҙы хлорлау.*

**ХЛОРЛЫ** *с.* Составында хлоры булған, хлор ҡушылған, хлор ҡатнаш. *Хлорлы натрий. Хлорлы цинк.*

**ХЛОРОЗ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и. бот.* Үҫемлектәрҙең йәшеллеген юя торған ауырыу. *Хлороз ауырыуы.*

**ХЛОРОПЛАСТ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и. бот.* Үҫемлек күҙәнәге протоплазмаһындағы фотосинтез өсөн кәрәкле хлорофиллы бөртөксә.

**ХЛОРОФИЛЛ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и.* Үҫемлектәрҙә яҡтылыҡ тәьҫирендә органик матдәләр барлыҡҡа килтереүҙә булышлыҡ иткән йәшел пигмент. *Хлорофилл бөртөксәләре.*

**ХЛОРОФОРМ** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Промышленноста — иреткес һәм фреон алыуҙа сырье булып ҡулланылған ҡырҡыу еҫле шыйыҡса (махсус рәүештә таҙартылғаны наркоз өсөн ҡулланыла).

**ХЛОРОФОС** [*рус.*] *и.* Ҡороҡҡос бөжәктәргә ҡаршы ҡулланылған ағыулы матдә.

**ХОҘА** [*фарс.*] *и. ҡар.* **хоҙай.** *Туташ ник өндәшмәйһегеҙ, хоҙа биргән ауыҙҙы асмайһығыҙ.* Ш. Бабич. **Я хоҙа** аллаға мөрәжәғәт иткәндә әйтелә. *[Күрәҙә:] Я хоҙа, мосолмандарыңды гонаһтан үҙең һаҡла.* Б. Бикбай.

**ХОҘАЙ** [*фарс.*] *и.* **1.** (*йәки* **хоҙай тәғәлә**). Дини ҡараш буйынса бөтә донъяны яратҡан, уға идара иткән юғары зат; алла, тәңре. *Хоҙайҙың әмере. Хоҙайға табыныу. Хоҙайға ышаныу. Хоҙайҙан өмөт итеү.* ■ *[Хәсби:] Атаһы, хоҙай биргән икән, быны гөшөрөн Тәүкәй муллаға тулыһы менән бирербеҙ инде.* Т. Йәнәби. **[Әй] хоҙайым** *йәки* **я хоҙай** хоҙайға ялбарып мөрәжәғәт иткәндә әйтелә. *Хоҙайым, йәтим ҡалдырма алмалай өс баламды* (Бәйеттән). *Кемде күрмә: я хоҙай, һаҡла үҙең! — тип зар илай.* Ш. Бабич.

**2.** *эйл. ф.* **хоҙайым** *ымл. мәғ.* Ҡапыл ҡурҡҡанда, ныҡ аптырағанда әйтелә. *Хаяттың әсәһе ҡурҡып: «Атаҡ, хоҙайым, эй раббым, Айбулатты тотҡандар бит»,— тине.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Хоҙай белһен** *шул уҡ* **алла белһен** (*ҡар.* **алла**). **Хоҙай бәндәһе** *шул уҡ* **алла бәндәһе** (*ҡар.* **алла**). **Хоҙай күрһәтмәһән** *ҡар.* **күрһәтәү. Хоҙайҙың ҡаты ҡәһәре төшкөр** *шул уҡ* **ҡәһәр һуҡҡыр** (*ҡар.* **ҡәһәр**; 3). **Хоҙай ҡунағы** *ҡар.* **ҡунаҡ. Хоҙай һаҡлаһын** *шул уҡ* **алла һаҡлаһын** (*ҡар.* **алла**). **Хоҙай хаҡы өсөн** *йәки* **хоҙай хаҡына** *шул уҡ* **алла хаҡы өсөн** (*ҡар.* **алла**). **Хоҙай ярҙам бирһен** *шул уҡ* **алла ярҙам бирһен** (*ҡар.* **алла**).

**ХОҘАЙЛЫҠ** *и. ҡар.* **хоҙай.** *[Ғәйшә:] Иренең шул уҫаллыҡтарын уйлап Айбикәне сәйнәп ташларҙай булам да, тағы ла хоҙайлығыңды уйлайһың.* Һ. Дәүләтшина.

**ХОҘАУӘНДӘ** [*фарс.*] *и. иҫк. ҡар.* **хоҙай** 1. *Хоҙауәндә, фазлың илә мәҙәт ҡыл, барса мөьминдең күңелен рәғбәт ҡыл* (Мөнәжәттән).

**ХОЗУР**[1] [*ғәр.*] *с.* **1.** Күңелгә йәм, ләззәт биргән; һоҡланғыс. *Хозур сәхрә. Хозур тәбиғәт. Хозур мәл.* ■ *Кешеләр ултырған еңел аҡ кәмәләр Димдең хозур урындарына табан үрмәләй.* Л. Ғадилов. *Ниндәй матур яҙғы түгәй, ҡырҙар! Ниндәй хозур тауҙар үҙәне.* Ҡ. Даян.

**2.** Ләззәтләнеү тойғоһо уятҡан, рәхәт. *Яҙ гәләмәте көн һайын арта бара, ҡайһы ваҡытта шундай хозур йылы ел иҫеп китте, хатта ҡарт сәпсектең дә йөрәге елпенеп китә ине.* Ғ. Боғданов.

♦ **Хозурын ебәреү** берәй нәмәнең йәмен, тәмен, ләззәтен юҡҡа сығарыу. *[Ғәләү:] Егеттәр күп һүҙгә бирелеп, аштың хозурын ебәрмәгеҙ, һыуытмай ашағыҙ.* Б. Бикбай. **Хозурға сығыу** 1) иркен мул тормошҡа сығыу; 2) яҙ көнө тәбиғәткә күңел асырға сығыу. *Хозурға бала-сағалар менән сыҡтыҡ.*

**ХОЗУР**[2] [*ғәр.*] *и.* Төб., у.-в., сығ. клш формаһында бәйл. функцияһын үтәп, кемдеңдер алды, ҡаршыһы тигән мәғәнәне белдерә. *Мулла хозурында ҡатын шул һүҙҙәрҙе тәкрар ҡылды.* М. Өмөтбаев. *Сапҡындар теге байҙы береһе башынан, береһе аяғынан тотоп, батша хозурына алып киләләр* (Әкиәттән).

**ХОЗУРЛАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Йәмле итеү, күркәмләндереү, матурландырыу. *Яланды хозурландырыу.*

**2.** Ләззәт, йәм биреп кинәндереү, рәхәтләндереү. *Күңелде хозурландырыу. [Ғәфүр:] Бала! Был һүҙ мине хозурландыра. Йөрәгем өсөн бынан да яҡын һүҙ юҡ хәҙер.* Ғ. Ғәйнуллин.

**ХОЗУРЛАНЫУ** *к.* **1.** Йәмле булыу, күркәмләнеү. *Муйылдар сәскә атҡан саҡты бигерәк яратам шул. Был мәлдә беҙҙең Егән буйы айырыуса хозурлана.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** Ләззәт табып кинәнеү, рәхәтләнеү. *Матур иртәгә хозурланып ашыҡмай ғына атлаған мышыларҙың артында ҡар бурандары өйөрөлөп ҡалды.* Р. Ғабдрахманов.

**ХОЗУРЛЫҠ** *и.* **1.** Күңелгә йәм, ләззәт биргән йәмлелек; күркәмлек. *Һәй, әйтмә лә инде ул йәйге көндәрҙең хозурлығын!* Я. Вәлиев. *Һыҙылып ҡына төшкән ҡояш нуры өйгә бер төрлө хозурлыҡ өҫтәй.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**2.** Ләззәтләнеү тойғоһо, рәхәтлек. *Хозурлыҡ уятыу. Хозурлыҡ кисереү.*

**ХОККЕ́Й** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Боҙ өҫтөндә, сирәмдә туп йәки шайба һуғып уйнай торған спорт уйыны. *Шайбалы хоккей. Хоккей ярышы. Хоккей майҙаны. Хоккей уйнау.*

**ХОККЕЙСЫ** *и.* Хоккей уйнаусы. *Хоккейсылар командаһы.* ■ *Салауат Юлаев исемендәге спорт клубы хоккейсылары «Трактор" командаһы менән дүрт тапҡыр алыштылар.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 24 февраль.

**ХОҠУҠ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Өҫтөнлөк иткән синыф ихтыярына ярашлы рәүештә дәүләт тарафынан билдәләнә һәм һаҡлана торған ижтимағи тәртип ҡағиҙәләре. *Һайлау хоҡуғы.* ■ *Рәсәйҙә крепостной хоҡуҡ юҡҡа сығарылғандан һуң, Башҡортостан яңы үҫеш юлына күсә.* М. Хисмәтов. / Йәмғиәт төҙөлөшө, тормош һәм йәмғиәт эшмәкәрлегенең бер өлкәһенә ҡараған дәүләт закондары һәм ҡарарҙар йыйылмаһы. *Гражданлыҡ хоҡуғы. Хеҙмәт хоҡуғы. Милек хоҡуғы.* / Шул закондарҙы өйрәнә торған фән. *Енәйәт хоҡуғы белгесе.*

**2.** Нимәлер эшләргә кемгәлер бирелгән һәм закон, ҡарар менән нығытылған ирек, рөхсәт. *Ялға хоҡуҡ. Эшкә хоҡуҡ. Хоҡуҡ алыу. Хоҡуҡ биреү.* ■ *Тулы хоҡуҡ менән йәшәр инем, эшләр инем эште ирекә!* Ғ. Хәйри. *Кем, кисәге ас, ҡол башҡортто бөгөн ил түренә баҫтырҙы? Кем һуң, хоҡуҡ биреп милләттәргә әсә телендә вуздар астырҙы.* Ғ. Амантай. / Ниндәйҙер эш-вазифаны үтәү өсөн бирелгән рәсми рөхсәт. *Етәкселек хоҡуғы. Хоҡуҡты файҙаланыу.* ■ *Улы элекке пүнәтәйлек хоҡуғымды, староста ҡыҙына булған дәғүәмде ҡайтарам, тип килә.* Ә. Вахитов.

**3.** Нимәлер эшләргә, ҡылырға ирек, мөмкинлек; хаҡ. *Миңә һүҙ әйтергә хоҡуғың юҡ.* ■ *Ишбулды үҙен Юлияның иң кәҙерле ҡустыһы итеп тойоп, шул хоҡуҡ менән уның янына һырылып ултырған.* Һ. Дәүләтшина. *Ғәҙелһеҙлеккә ҡоролған иҫке донъяла шәхестең бер генә лә хоҡуғы юҡ, ул алла һәм батша ҡоло, шәриғәт һәм закондар тарафынан иҙелгән кеше.* Ғ. Рамазанов.

**ХОҠУҠИ** [*ғәр.*] *с.* Хоҡуҡҡа (1, 2 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Хоҡуҡи нормалар.* / Хоҡуҡ ҡағиҙәләренә нигеҙләнгән. *Хоҡуҡи мөнәсәбәт.*

**ХОҠУҠЛЫ** *с.* Нимәгәлер хоҡуғы булған. *Тиң хоҡуҡлы. Тулы хоҡуҡлы.*

**ХОҠУҠЛЫҠ** *и.* Хоҡуҡҡа эйә булған хәл. *Тулы хоҡуҡлыҡ.*

**ХОҠУҠҺЫҘ** *с.* Хоҡуҡтан мәхрүм ителгән; хоҡуғы булмаған. *Хоҡуҡһыҙ кеше. Хоҡуҡһыҙ булыу.*

**ХОҠУҠҺЫҘЛАУ** *к.* Хоҡуҡты сикләү, хоҡуҡтан мәхрүм итеү.

**ХОҠУҠҺЫҘЛЫҠ** *и.* Хоҡуҡһыҙ хәл. *Хоҡуҡһыҙлыҡҡа ҡаршы көрәш.*

**ХОЛЁРА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. ҡар.* **ваба.**

**ХОЛЁРИК** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡыҙыу тәбиғәтле, ҡыҙыу ҡанлы кеше.

**ХОЛЕРИ́К** *с.* Холҡонда ҡыҙыулыҡ булған, ҡыҙыу тәбиғәтле. *Холерик кеше.*

**ХОЛЕЦИСТИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Үт ҡыуығы шешеүе.

**ХОЛОДИ́ЛЬНИК** [*рус.*] *и. ҡар.* **Һыуытҡыс.**

**ХОЛОҠ** [*ғәр.*] *и.* Кешенең ҡылығында сағылған тотороҡло рухи һәм психик үҙенсәлектәр; характер. *Баҫалҡы холоҡло кеше. Күркәм холоҡло кеше. Тиҫкәре холоҡло кеше.* ■ *[Хафиз ҡарт:] Ямал килен, Йомағолдоң холҡон беләһең бит. Әҙерәк яйына ла торорға кәрәк ине.* М. Тажи. / Малдың ҡылығына әйләнеп киткән сифат; ғәҙәт, ҡылыҡ. *Ләкин донъя күргән, атының холҡон белгән бригадир улай уйламаны. Юҡ, Аҡҡола — күнеккән мал өйөрөнән айырылырға теләмәй тегел.* Б. Бикбай.

◆ **Холоҡ төҙәтеү йорто** иркенән мәхрүм ителгән кешеләрҙе мәжбүри хеҙмәт менән тәрбиәләй торған урын; төрмә. *Ирекүгә кешеләр, холоҡ төҙәтеү йортона ингәс кенә, иркенлек кәҙерен белә.* И. Насыри.

● *Яҡшы атта ла бер холоҡ була.* Мәҡәл.

**ХОЛОҠЛАНЫУ** *к.* **1.** Холоҡ яҡшырыу.

**2.** Ҡылыҡ, ғәҙәтте үҙгәртеү (малға ҡарата). *[Нурулла бейәһе хаҡында:] Ҡара нисек китеп барған була, йөрөгән ҡапҡаһын да оноҡҡан. Имеш, колхоз аҙбарына баргас, холоҡланган яңы холоҡтан!* С. Ҡудаш.

**ХОЛОҠ-ФИҒЕЛ** *и. йыйн. иҫк.* Кеше йәки башҡа йән эйәләре тәбиғәтендәге һәр төрлө үҙенсәлектәр; төрлө ҡылыҡ һәм ғәҙәт. *[Бабай:] Ғәйепләштән булмаһын, кем, Зиннур, балыҡ тотор өсөн дә уның холҡон-фиғелен белеп эш итергә кәрәк.* Ә. Вахитов.

**ХОЛОҠҺОҘ** *с.* Насар холоҡло, яман характерлы; тәртибе насар; ҡылыҡһыҙ. *Холоҡһоҙ кеше. Холоҡһоҙ булыу.* ■ *Мулла кешеһе лә шулай холоҡһоҙ булыр икән.* Т. Хәйбуллин. / Насар ғәҙәтле (малға ҡарата). *Холоҡһоҙ һыйыр.*

**ХОЛОҠҺОҘЛАНЫУ** *к.* Холоҡһоҙға әйләнеү, холоҡһоҙ булыу; холҡо насарайыу, характеры боҙолоу. *Холоҡһоҙланып китеү.* ■ *Мәғфиә әбей иренең ороро холоҡһоҙланып ҡайтҡанын һиҙҙе, ләкин ул турала һүҙ ҡуҙғатмай, йүгерә-йүгерә ашарға ултыртты.* Б. Бикбай.

**ХОЛОҠҺОҘЛОҠ** *и.* Яман ҡылыҡ, насар характер. *Холоҡһоҙлоҡто бөтөрөү. Холоҡһоҙлоҡ менән көрәшеү.*

**ХОПОР** *окш.* Шыйыҡ нәмәне ҡабаланып ҡапҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Хопор итеү. Хопор иттереү.*

**ХОПОРЛАТЫУ** *ҡ.* Хопор-хопор итеү, хопор-хопор килеү. *Өйрәнең шыйыгын хопорлатып эсеү.*

**ХОПОРЛАУ** *ҡ.* Хопор-хопор итеү, хопор-хопор килеү.

**ХОПОР-ХОПОР**, **хопор ҙа хопор** *окш.* Ҡабат-ҡабат хопор иткән тауышты белдергән һүҙ. *Хопор-хопор итеп эсеү. Хопор-хопор килеү.*

**ХОР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *тар.* Боронғо грек трагедияларында һәм комедияһында ҡатнашыусы коллектив герой.

**2.** Бергәләп музыкаль әҫәр башҡарған йырсылар төркөмө. *Балалар хоры. Хор дирижёры. Хор менән етәкселек итеү. Хор тыңәрәге.* ■ *Ул арала булмай хор «Салауат» маршын йырларға керешеп китте.* З. Биишева. *Концертты ҙур хор башланы. Вьетнамдар ҡумәк йырға әүәҫ халыҡ.* М. Кәрим. / Йырсылар төркөмө башҡарыу өсөн яҙылған музыкаль әҫәр, пьеса. *Хор яҙыу. Хор башҡарыу.*

**3.** Бер үк ваҡытта яңғыраған ҡумәк тауыш. / *[Приказчиктар] шарҡылдап көлә башланылар. Был көлөүгә тауар алырға килгән кешеләр ҙә ҡушылалар. Шунан ул әллә ниндәй мәғәнәһеҙ, ыңәсте быуғыс хорға әйләнә.* С. Агиш.

◆ **Хор менән** 1) ҡумәк йырға ҡушылып, күп тауыш менән. *Хор менән хур ҡыҙҙары йырлаштылар.* Ш. Бабич. *[Гөлйөҙөм] бөтә концерттарҙа йырлап сыҡты, хор менән дә, яңғыҙ ҙа.* Һ. Дәүләтшина; 2) барыһын бергә, бер тауыштан, ҡумәкләп. *Хор менән уҡыу. Хор менән яуап биреү.* ■ *Сәгиҙә балаларҙан хор менән «Осто, осто — ҡарғалар осто! — тигән һүҙҙәрҙе әйттерҙе һәм үҙе Мансурҙың теләнә ҡолаҡ һалып йөрөнө.* М. Тажи.

**ХОРВА́Т** *и.* Югославия составындағы Хорватияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (славян телдәренең береһендә һөйләшә). *Хорват халҡы.*

**ХО́РДА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *мат.* Кәкре һыҙыҡтың ике нөктәһен тоташтырған тура һыҙыҡ.

**2.** *зоол.* Ҡайһы бер хайуандарҙа һәм кешеләрҙә һөлдәнең беше еп рәүешендәге иң тәүге, башланғыс үҙәге; арҡа ҡылы.

**ХОРЕ́Й** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* *әҙ.* Силлабо-тоник шиғырҙарҙа баҫымы беренсе ижекқә төшкән ике ижекле стопа.

**ХОРЕО́ГРАФ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Хореография буйынса белгес. *Илебеҙҙәге күренекле хореографтарҙың береһе булған Фәйзи Ғәскәровтың таланты, ижади фантазияһы баһалап бөтөргөһөҙ.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 17 ғинуар.

**ХОРЕОГРАФИК** *с.* Хореографияға мөнәсәбәтле. *Тамашасылар «Төньяҡ амурҙары» тигән хореографик поэманы бик йылы ҡабул итте.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 16 ғинуар.

**ХОРЕОГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* Бейеү сәнғәте. / Бейеүҙәр һәм балет спектакле әҙерләү, ҡуйыу сәнғәте.

**ХОРИСТ** [*рус.*] *и.* Хорҙа (2 мәғ.) йырлаған кеше.

**ХОРҠ** *окш.* Сусҡа сығарған тауышты белдергән һүҙ. *Хорҡ итеү.*

**ХОРҠОЛДАУ** *ҡ.* Хорҡ-хорҡ итеү, хорҡ-хорҡ килеү. *Сусҡа һымаҡ хорҡолдау.*

**ХОРҠ-ХОРҠ**, **хорҡ та хорҡ** *окш.* Ҡабат-ҡабат хорҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Хорҡ-хорҡ итеү. Хорҡ-хорҡ килеү.*

**ХОРМЕ́ЙСТЕР** [*рус.* ⟨ *гр.* + *нем.*] *и.* Хор етәксеһе, хор дирижёры. *Хормейстер булыу.*

**ХОРУ́НЖИЙ** *и.* *кар.* **харунъя.**

**ХОСРАН** [*ғәр.*] *и.* *иҫк.* *кит.* Ниҙәндер яҙыу, нимәнелер юғалтыу хәле. *Үтте ғүмерем, барыһы хосран икәндер, белмәнем.* Һ. Салихов.

**ХОСУЛ** [*ғәр.*] *и.* *иҫк.* *кит.* Килем, файҙа; доход. *Беҙгә йәй буйы өҙлөкһөҙ эшләнә торған һәм иң аҙында 30—40 һум хосул килтерә торған эш кәрәк.* М. Ғафури.

**ХОСУС** [*ғәр.*] *и.* *иҫк.* *кит.* Булған бер хәл, күҙҙә тотолған бер мәсьәлә. *Ҡайһы бер хосуста. Эштең был хосусында.* ■ *Шәкерттәрҙең дәрттәре юҡ туҙан ҡәҙәр, йөрәкте яндыралыр ошо хосус.* М. Ғафури.

**ХОСУСАН** [*ғәр.*] *р.* *кит.* Айырыуса, бигерәк тә. *Башҡорт сәнғәте, хосусан .. башҡорт театры, Бөйөк Октябрь революцияһы һуңында ғына тыуҙы.* Д. Юлтый.

**ХОСУСИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Берәй шәхескә, айырым бер кешегә ҡараған; шәхси. *Мин үҙемдең хосуси бер йомошом менән Зыя хәҙрәт Камалийҙы күрергә Ғәлиә мәҙрәсәһенә барҙым.* Ш. Фидаи.

**2.** Үҙенә бер башҡа; айырым. *Бәғзе заттарға кәләм артыҡ еңеллек әйләгән, бәғзеләрен бер хосуси хәлгә бәйләп сәйнәгән.* Ш. Бабич.

**3.** Йәмәғәткә ҡағылмаған айырым кешеләр тарафынан башҡарылған. *Хосуси кәңәшмә.* ■ *[Татар буржуаһы] көн дә хосуси мәжлестәр яһап кына булһа ла, был хаҡта кәңәшә.* З. Шәрҡи.

**4.** Үҙҙәренә айырым эш иткән, дәүләткә, дәүләт ойошмаларына ҡағылмаған. *Хосуси уҡытыусы. Хосуси сауҙагәр.* ■ *Журнал хосуси кешеләр тарафынан нәшер ителде.* Т. Йәнәби.

**5.** Дәүләт милкенә бәйле булмаған, айырым кеше ҡулындағы. *Хосуси хужалыҡ. Хосуси квартира.* ■ *Дәүләт һәм кооперация сауҙаһы хосуси сауҙанан өҫтөн .. барырға тейеш.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**ХОСУСИӘТ** [*ғәр.*] *и.* *кит.* Үҙенсәлек, айырмалыҡ. *Ижад хосусиәте. Тел хосусиәте. Эш хосусиәте.*

**ХОСУСИӘТЛЕ** *с.* *иҫк.* *кит.* Үҙенсәлекле. *Хосусиәтле фекер.*

**ХОСУСЫНДА** *бәйл.* *иҫк.* Төп килештәге исемде бәйләп килә; тураһында, хаҡында. *Һәм был илтимаг ғаризалар хосусында рәхимле шаһыбыҙ Павел Петров мәрхәмәт итеп землемерҙар ебәрҙе.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ХОХОҠ** *и.* Көрән башлы, аҡ ҡорһаҡлы буҙ өйрәк.

**ХОШ** [*фарс.*] *и.* *диал.* Ҡиәфәт. *Хошһоҙ кеше.* / Кәйеф. *Һинең бөгөн хошоң юҡ.*

**ХӨДДӘ:** **хөддәһенә сығыу** *һөйл.* кәрәген биреү, уҡытыу. *[Акбирҙе:] Солтан түгелме икән шул, хәйерһеҙ? Хөддәһенә сыкмай ярамаҫ, ҡыҫмаҡҡа алайым әле.* З. Ураҡсин.

**ХӨДҮТ** [*ғәр.*] *и. иçк. кит.* Берәй дәүләттең сиген күрһәткән һыҙыҡ; сик. *Башҡортостан хөдүте.*

**ХӨЖРӘ** [*ғәр.*] *и. иçк.* **1.** Мәҙрәсә ятағындағы ял итә торған бүлмә. *Малайҙы отҡор сауҙагәр мәҙрәсә хөжрәләренең береһенә алып килде.* К. Мәргән.

**2.** Йорт, бина эсендәге бүлмә. *[Сабир мулла:] Йәһәннәмдең уты һүнә башлаған .. аллаһы тәғәләнең хөжрәһендә ҙур йыйылыш булған икән.* Б. Ишемғол.

**ХӨЗӨН** [*ғәр.*] *и. иçк. кит.* Ҡайғы. *Унда бер шатлыҡ, рәхәт, бер ғәм, хөзөн.* Ғ. Иҫәнбирҙин.

**ХӨКӨМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Дәүләт менән идара итеү хоҡуғы; власть. *Батша хөкөмө. Хөкөмгә алыу.* ■ *Баяр булғас, хөкөмө лә үҙ ҡулында булған инде.* М. Тажи. *Большевиктар әйтә: «Был донъяла ярлы халыҡ хөкөмө йөрөһөн»,— тип.* Ш. Бабич. / Ниmәнелер эшләргә, башҡарырға ҡушҡан ҡәтғи күрһәтмә; әмер, бойороҡ. *Падишанан хөкөм тип, сығарҙылар взводка* (Бәйеттән). *Шулған батша үҙенең хөкөмөн үҙгәртмәгән.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** Төрлө бәхәстәрҙе хәл иткән һәм енәйәт эштәрен ҡараған дәүләт органы; суд. *Хөкөм комиссияһы. Хөкөм ҡарары. Хөкөмгә биреү. Хөкөмгә тарттырыу. Хөкөм алдына баҫыу. Хөкөм яһау.* / Ошо орган тарафынан шул эште ҡарағандан һуң сығарылған ҡәтғи ҡарар. *Ғәҙел хөкөм. Хөкөм сығарыу. Хөкөмдө еренә еткереү.* ■ *Судья тыңҡыш, йомро кәүҙәһен күтәреңкерәп кағыҙ тотҡан ҡулдарын эре генә итеп алға һуҙып, хөкөмдө уҡый башланы.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Берәй эште хәл итеүгә кемгәлер ҡуйылған ирек, ихтыяр; ҡарамаҡ. *Китапты уҡыусылар хөкөмөнә тапшырыу.* / Шул күҙлектән ҡарап әйтелгән фекер. *Хөкөмгә килеү.*

**4.** Эштең, ҡылыҡтың башҡарылған тәртибе. *Иман белмәй, динде тотмай мөрит булмаҡ, тәһәрәттең хөкөмөн белмәй намаҙ ҡылмаҡ* (Мөнәжәттән).

**5.** Кем йәки нәмә кеүек; кем йәки нәмә дәрәжәһендә. *Бала хөкөмөндәге кеше. Юҡ хөкөмөндәге нәмә.*

□ **Хөкөм итеү** 1) идаралыҡ итеү. *Батша .. ғәҙел генә хөкөм итеп әле булһа йәшәй, ти* (Әкиәттән); 2) ниндәйҙер эште судта ҡарау. *Бөгөн суд залында, халыҡ алдында өс үҫмерҙе хөкөм итәләр.* С. Кулибай; 3) судта ҡарап, ҡарар сығарып, яза биреү. *Солтановты ун биш йылға хөкөм иттеләр.* Б. Бикбай; 4) уйлау, фекер йөрөтөү. *Ер тетрәүҙән ҡурҡышып, таңға ҡалып, төрлө әҙәм төрлөсә хөкөм итте.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

♦ **Алланың** (*йәки* **хоҙаның**) **хөкөмө** аллаһы тәғәлә ҡушҡан эш. *[Ҡарт:] Ҡайҙан сыҡты инде был афәт. Әй алланың хөкөмө.* Һ. Дәүләтшина. **Хөкөм йөрөтөү** 1) баш булыу, хакимлыҡ итеү. *Ҡолтүбә .. картын-йәшен теҙ сүктереп, зар илатып хөкөм йөрөтә башлаған, ти* (Әкиәттән); 2) уйлау, фекер итеү. *Яңы мәғлүмәттәрҙән сығып хөкөм йөрөтөү.* **Хөкөм һөрөү** 1) власть башында тороу; 2) өҫтөнлөк итеү. *1905—1907 йылдарҙағы буржуаз-демократик революция Россияла быуаттар буйы хөкөм һөргән ҡанундарҙың нигеҙен ҡаҡшатты.* В. Әхмәҙиев; 3) *күсм.* биләп алыу, урынлашыу. *Тынлыҡ хөкөм һөрә.* ■ *Диңгеҙ өҫтөндә иҫ киткес ғорур һәм мөһабәт тынлыҡ, ҡабатланмаҫ наҙ хөкөм һөргән.* З. Биишева.

● *Ил хөкөмһөҙ булмай.* Әйтем.

**ХӨКӨМДАР** [*ғәр.*+*фарс.*] *и. кит.* **1.** Ил башлығы, хөкөм йөрөтөүсе; хаким, батша.

**2.** Етәкселек итеүсе, хужа. *Көндәлек уға [Әҙһәмгә] үҙенең эштәренә, ҡылығына баһа биреү өсөн кәрәк булған. Көндәлек уның намыҫы, уның хөкөмдары булған.* «Ағиҙел», 1967, № 1.

**ХӨКӨМНАМӘ** [*ғәр.*+*фарс.*] *и. иçк. кит.* Хөкөм яҙылған ҡағыҙ.

**ХӨКӨМСӨ** *и. иçк. кит.* Хөкөм йөрөтөүсе, хөкөм итеүсе; судья. *[Батша:] Мин был эште хөкөмсөләргә тапшырам. Улар ниндәй хөкөм сығарһа, мин шуға риза* (Әкиәттән).

**ХӨКҮМӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Дәүләт менән идара иткән юғары орган. *Буржуаз хөкүмәт. Батша хөкүмәте. Революцион хөкүмәт. Совет хөкүмәте. Хөкүмәт ағзалары.* ■ *Алтынсы октябрҙә Совет Хөкүмәте аҡтарҙан таланған башҡорттарға ярҙам итеү хаҡында ҡарар ҡабул иткән. Уға Ленин үҙе ҡул ҡуйған икән.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *һөйл.* Дәүләт. *Хөкүмәткә иген тапшырыу.*

♦ **Хөкүмәт кешеһе** дәүләт учреждениеларында билдәле бер вазифа алып барған хеҙмәткәр; ҡаҙна кешеһе.

**ХӨЛЛӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иçк. кит.* Бик затлы яҡшы кейем. *Батша хөлләһе.* ■ *Тағы кейҙем туҙған ҡулдәгемде — наҡыҫыраҡ, бер аҙ тарыраҡ, тик янында хандар хөлләһе лә мең ҡат түҫһөҙ, мең ҡат ярлыраҡ.* Р. Назаров.

**2.** *күсм.* Насар, алама кейем. *[Мин — Шәмсиәгә:] — Ярай, был хөлләң менән ҡунаҡҡа бармаҫһың әле.., тинем.* Ғ. Ғүмәр.

**ХӨЛТӨПӘЙ** *с. диал.* Килешмәгән, насар, хөрт (эшкә ҡарата). *Хөлтөпәй эш.*

**ХӨНӘСӘ** [*ғәр.*] *и. һөйл.* Ике енесле кеше йәки хайуан.

**ХӨР** [*ғәр.*] *с.* **1.** Һис ни менән сикләнмәгән, үҙ ихтыярлы, үҙаллы; азат, ирекле. *Хөр тормош. Хөр булыу. // Хөр йәшәү.* ■ *Беҙ матур Урал буйҙарында, Йайыҡ ярҙарында, Ағиҙел туғайҙарында, иҙеүҙәрен сисеп ебәреп, иркен йәшәргә өйрәнгән хөр башҡорт балаһыбыҙ.* И. Насыри. *Аяклан форсатта, хөр саҡта, ҡанатлан яҡяҡҡа нур саҡта, етерлек иҙелдең, йәнселдең, бәйләндең тоҙаҡҡа, кол саҡта.* Ш. Бабич. *Күкрәккәйем тулы моң ине, мин үҙем дә хөр ҡарсыға инем, ә йәшлегем — яҙғы таң ине.* В. Әхмәҙиев.

**2.** Тартынып тормаған, үҙен ирекле, иркен тотҡан. *Хөр фекерле. // Үҙен хөр тотоу.* ■ *Һажәр ауылдағы ҡыҙҙарҙың иң сибәрҙәренән булыу өҫтөнә, хөрҙәренән дә ине. Шул хөрлөгө өсөн дә уны ауылдың динселәре яратмай.* И. Насыри. *Рәхимә, гимназияла тәрбиәләнгәнлектән, үҙен бик хөр тота.* Ғ. Хәйри.

**3.** Юҡлыҡты, етешһеҙлекте белмәгән; бәхетле, мул, иркен. *Хөр тормош. // Хөр йәшәү.* ■ *Маҡсаты бер совет кешеһенең, академик һәм дә чабандың: күр йәшәһен, тиҙәр, хөр йәшәһен кешеләре беҙҙең замандың.* Х. Ғиләжев.

4. Рәхәтлек биргән, иркен. *Асылды йәннәте ватандың, сәселде хуш һауа, хөр һауа.* Ш. Бабич.

♦ **Хөр күңелле** шат, күтәренке күңелле. **Хөр фекерле** киң ҡарашлы, алдынғы фекерле. *Иҫке ҡарашлы Солтан Аҙнабаев кеүектәр хөр фекерле йәштәрҙе аяуһыҙ эҙәрлекләргә тотоналар.* Ғ. Хөсәйенов.

**ХӨРЛӨК** *и.* **1.** Бойондороҡһоҙлоҡ, азатлыҡ. *Милли хөрлөк. Хөрлөккә сығыу.* ■ *Ҡоллоҡ бығауҙары ҡыйратылды, Чехияла хөрлөк таңы тыуҙы.* Ғ. Әмири.

**2.** Сикләнмәгән, иркенлек. *[Мифтах:] һарғайҙым тәҙрәнән ҡарай-ҡарай, күңелем менән иркенлек, хөрлөк һорай.* К. Мәргән.

**3.** Етеш, мул тормош; муллыҡ. *Хөрлөктә йәшәү.*

**ХӨРМӘ** [*фарс.* ‹ *төрк.*] *и.* **1.** Ҡауырһын япраҡлы көньяҡ ағасы йәки ҡыуағы. *Хөрмә ағасы.* ■ *[Януҙаҡ карт Хажиғәлиғә:] Әллә Фәхри мулла теге донъяла алма, хөрмә үҫеп ултырған баҡса, хур ҡыҙҙары вәғәҙә иттеме?!* М. Тажи.

**2.** Шул ағастың йәки ҡыуаҡтың һарғылт ҡыҙыл төҫтәге татлы емеше. *Ҡормашыйҙар түр башында хөрмә ашайҙар, билләһи!* Ш. Бабич.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ХӨРМӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кеше элек күрһәтелгән ҡәҙер, ихтирам. *Хөрмәт күрһәтеү. Хөрмәт менән ҡаршылау.* ■ *Новиков тороп хужаның ҡулын ҡыҫты: — Ярай был хөрмәтеңде онотмабыҙ, тине.* Д. Юлтый.

**2.** *бәйл. функцияһында* Төп килештәге исемде һәм эйәлек килешендәге алмашты бәйләп килә; хаҡына, уңайы менән. *Байрам хөрмәтенә үйын үткәреү.* ■ *[Бабай:] Минең хөрмәткә улым менән киленем кисен ҡунаҡ йыйҙы.* Р. Низамов. *Халыҡ .. илде афәттән ҡотҡарған Бабсаҡ батыр хөрмәтенә ойошторолған түйҙы дауам итә.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

☐ **Хөрмәт итеү** хөрмәтләү.

♦ **Хөрмәт ҡарауылы** *ҡар.* **ҡарауыл** [1].

● *Хеҙмәте барҙың хөрмәте бар.* Әйтем.

**ХӨРМӘТЛЕ** *с.* Хөрмәткә, ихтирамға лайыҡ булған, хөрмәт, ихтирам ителгән (кешегә ҡарата). *Хөрмәтле ҡунаҡ.* / Ололап мөрәжәғәт иткәндә кешенең исеменә ҡушып әйтелә.

**ХӨРМӘТЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Ололап хөрмәт күрһәтеү; ихтирам итеү. *Хөрмәтләп ҡаршы алыу. Хөрмәтләп оҙатыу.* ■ *Уны [Заятүләкте] бик хөрмәтләп атаһының һарайына алып ҡайталар.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** Ололау, ҙурлау. *Халҡы уны [Зәйнәпте] хөрмәтләп, халыҡ артисткаһы тигән маҡтаулы исем бирҙе.* Х. Әхмәтов.

**ХӨРМӘТСЕЛ** *с.* Кешегә ихтирамлы, хөрмәт күрһәтеүсән. *Хөрмәтсел кеше. Хөрмәтсел булыу.*

**ХӨРМӘТ-ҺЫЙ** *и.* Ҡунаҡ өсөн әҙерләнгән һәр төрлө һый; һый-хөрмәт. *Хөрмәт һый күрһәтеү.* ■ *Төндәр буйы хөрмәт итә [Төлкө] ҡоҙаһын, ҡоҙағыйын .. теҙеп ҡуя өҫтәл тулы ҡиммәтле хөрмәт-һыйын.* Х. Кәрим.

**ХӨРРИӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Бойондороҡһоҙлоҡ, ирек, азатлыҡ. *Хөрриәт яулау.* ■ *[Хәпкәй:] Йә, ағай-эне, Васька бик шатлыҡлы хәбәр алған: хөкүмәт эшселәр ҡулына күскән, буржуйҙар бөтә. Хөрриәт. Ярлы-ябағаға ирекле, яҡты көн килде.* Л. Ғәлимов.

**2.** Ҡыҫынҡылыҡ, тарлыҡ һиҙелмәгән киңлек; иркенлек. *[Биксән ағайға] бында бит хөрриәт. Нисек теләй — шулай йәшәп тик ята. Мал аҫрау өсөн дә дан.* Р. Солтангәрәев.

**ХӨРТ** *с.* Ынғай баһаға торошһоҙ; насар; кирәһе яҡшы. *Хөрт кеше. Хөрт эш. // Хөрт йәшәү.* ■ *Инженерҙың йә ғалимдың хөртө булғанса, ниндәй хөрмәт, әгәр булһаң яҡшы мунсасы.* Ш. Бикҡол. *[Ғәләү:] Беҙҙә шулай көттөрөбөрәк килеү ғәҙәт инде ул .. [Ҡадир:] хөрт ғәҙәт.* Б. Бикбай.

♦ **Эш хөрт** хәлдең насарлығын белдереп әйтелә.— *Ну, туғандар, эш хөрт.* Һ. Дәүләтшина.

**ХӨРТЛӨК** *и. диал.* Етешһеҙ тормош, юҡсыллыҡ. *Хөртлөктә йәшәү.*

**ХӨРТӨЙ** *с. һөйл.* Хөрт. *Хөртөй эш.* ■ *Яңы темалар өҫтөндә эшләүем менән хөртөй.* Р. Ниғмәти.

**ХӨРТӨЙЛӘНЕҮ** *ҡ. һөйл.* Хөртәйеү.

**ХӨРТӘЙЕҮ** *ҡ. һөйл.* Хөрткә әйләнеү, хөрт булыу; насарланыу. *Эштәр хөртәйҙе.* ■ *Алғы һыҙыҡта хәл торған һайын хөртәйә бара.* Д. Юлтый.

**ХӨРТӘМЕШ** *с. диал.* Хөрт. *Цурюпа .. бер бик хөртәмеш тәпәш йортта тора; йорто насар булһа ла, матур ғына баҡсаһы бар.* «Ағиҙел», 1970, № 4.

**ХӨРТӘМШӘ** *с. диал.* Эшкинмәгән, булдыҡһыҙ. *Хөртәмшә кеше.* / Әрләгәндә әйтелә.

**ХӨРШИТ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ҡояш, көн.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ХӨРӘСӘН** *и. мыҫҡ.* Ҡулынан эш килмәгән көйө эшләп йәки һөйләп маташҡан кеше; эшкинмәгән, йүнһеҙ кеше. *Танау аҫты ла йүнле кипмәгән был хөрәсәндең шулай һөйләнеүе Абдуллаҡың һарыуын ҡайнатты.* Н. Мусин. / Әрләгәндә әйтелә.— *Эй, хөрәсән, һаман ҡыҙ һөйләйһең, балаларың хаҡында ныҡырак уйла.* Ғ. Шәрипов.

♦ **Хөрәсән ялҡауы** *шул уҡ* **ата ялҡау** (*ҡар.* **ялҡау**).

**ХӨРӘФӘТ** [*ғәр.*] *и.* Тәбиғәт күренешенә, һәр төрлө хәл-ваҡиғаға серле мәғәнә биргән уйҙырма. *Дини хөрөфәт.* / Юҡ-барға ышаныу күренеше. *Ят булдылар күңелемә төрлө-төрлө хөрәфәттәр.* Н. Нәжми.

**ХӨСНӨ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Күркәм, матур. *Хөснө холоҡ. Хөснө ниәт.*

♦ **Хөснө зан** яҡшы уй, яҡшы ниәт. *[Мин хәлфәләргә] хөснө зан менән ҡарап, былар бик ғилем кешеләрҙер инде, тигән фекерҙе башҡа ултыртып ҡуйҙым.* М. Ғафури.

**ХӨСӨТ** [*ғәр.*] I *с.* **1.** Көнсөл, яуыз. *Хөсөт кеше.*

**2.** Насар уйлы; үсле, дошман. *Туғандарым менән хөсөт булдым, Хәбирә һылыу, һинең дәртеңдән* (Халыҡ йырынан). *Хөсөт күҙгә был хатымды уҡытмағыл, иғтибарһыҙ ергә ҡуйып юғалтмағыл* (Бәйеттән).

II *и.* **1.** Көнсөллөк, дошманлыҡ. *Хөсөт ҡылыу.* ■ *Бөтөр шунда был көндәге хөсөт һәм дошманлыҡ, тыуыр донъяға дуҫлыҡтар.* М. Ғафури.

**2.** Насар эшкә ҡотортҡан һүҙ; ҡотҡо. *Хөсөт йөрөтөү. Хөсөт таратыу. Хөсөткә бирелеү. Кемдеңдер хөсөтөн тотоу.* ■ *[Ниғмәтулла:] Мин уның хөсөтөн тотоп, дуҫ-иштән яҙҙым.* Я. Хамматов. **Хөсөт ҡойоу** кемгәлер ҡаршы отҡо һалыу, ҡотҡо таратыу.

**ХӨСӨТЛӨК** *и.* Яуызлыҡҡа ҡоролған эш; яманлыҡ, хаслыҡ. *Хөсөтлөк ҡылыу. Хөсөтлөк уйлау. Хөсөтлөк эшләү.* ■ *[Ташйегет:] Бында хәҙер мине яратмайҙар. Бөтәһе лә минән көлөләр, әҙерләйҙәр, ахыры, хөсөтлөк.* К. Мәргән.

**ХӨСӨТЛӘШЕҮ** *ҡ.* Үҙ-ара дошманлашыу, бер-береңә хаслашыу. *Хөсөтләшеп йәшәү.* ■ *Аллаяр атаһынан ситһенеп, ҡырғыҙ булып үҫә .. иҫ керә-керә, ҡарун атаһына хөсөтләшеүен арттыра. Хужалыкҡа күңел һалмай.* Ф. Иҫәнғолов.

**ХӨСӘЙЕН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Бик яҡшы.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ХӨТБӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Никах ваҡытында уҡыла торған доға.

**2.** Вәғәз. *Хөтбә уҡыу.* ■ *Бер мулла «Ғәйеттә саҙаҡа биреү ҙур сауап» тип вәғәз һөйләгәс, хөтбәне тыңларға барған абыстай тиҙ генә ҡайтып мулланың күлдәк-ыштанын хәйергә таратҡан* (Әкиәттән).

**ХӨШТӨМҺӨҘ** *с. диал.* Йәмһеҙ, һөйкөмһөҙ. *Хөштөмһөҙ кеше. Хөштөмһөҙ булыу.* / Әрләгәндә әйтелә.

**ХӨШТӨР** *с. һөйл.* Йолҡош, насар. *Хөштөр кейем.* // *Хөштөр кейенеү.*

**ХӨШҺӨҘ** *с. диал.* Мәғәнә белмәгән, йүнһеҙ, мәғәнәһеҙ. *Хөшһөҙ әҙәм. Хөшһөҙ булыу.*

**ХӨШҺӨҘЛӨК** *и. диал.* Мәғәнәһеҙлек. *Хөшһөҙлөк күрһәтеү.* ■ *[Төхфәт:] Гөлнәзирәнең өшөп ҡалтыраныуын күргәс кенә, эстән үҙен хөшһөҙлөктә ғәйепләп, ҡыҙҙың яурынына пинжәген һалды.* Й. Солтанов.

**ХРАМ** [*рус.*] *и.* **1.** *ҡар.* **ғибәҙәтхана.**

**2.** *күсм. юғары* Бөйөк хистәр уятҡан, хөрмәт ителә торған урын. *Сәнғәт храмы. Фән храмы.*

**ХРЕСТОМА́ТИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Һайланма әҫәр йәки әҫәр өҙөктәренән йыйылған уҡыу китабы. *Мәктәп хрестоматияһы.*

**ХРИЗАНТЕ́МА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ойошма сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған эремдеке кеүек әскелтем еҫле, киртләс япраҡлы ялбыр сәскәле декоратив үҫемлек; алтын сәскә. *Аҡ хризантема. Ал хризантема.*

**ХРИСТИАН** [*рус.* христианин ⟨ *гр.*] *и.* Христиан динен тотҡан кеше. // *Христиан байрамдары.* **Христиан дине** беҙҙең эраның I быуатында барлыҡҡа килгән, нигеҙҙә Иисус Христосҡа (Ғайса пәйғәмбәргә) табынырға өндәгән дин.

**ХРИСТИАНЛЫҠ** *и.* Христиан дине.

**ХРОМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Химик элемент, ялтыр көмөш төҫөндәге ҡаты металл (ҡаты иретмәләр алыуҙа ҡулланыла).

**2.** Ошо химик элемент тоҙҙары ярҙамында эшләнгән йоҡа йомшаҡ күн. *Хромдан тегелгән сумка.* // *Хром ботинка.* ■ *Якуптың өҫтөндә гимнастёрка, портупеялы ҡайыш, зәңгәр галифе .. ялт итеп торған хром итек.* И. Абдуллин.

**ХРО́МКА** [*рус.*] *и. һөйл.* Иң бәләкәй интервалды тауышҡа йәки ярым тонға ҡулайлаштырылған гармун. *Хромкала уйнау.*

**ХРОМЛАУ** *ҡ.* **1.** Хром (1 мәғ.) ялатыу, хром менән ҡаплау, хромлы итеү. *Һауыт-һабаны хромлау.*

**2.** Нимәнелер хром (1 мәғ.) тоҙҙары менән эшкәртеү, йомшартыу. *Күнде хромлау.*

**ХРОМЛЫ** *с.* Хром (1 мәғ.) ҡатнаш. *Хромлы ҡорос. Хромлы буяу.*

**ХРОМОСО́МА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. биол.* Тере йән эйәләре һәм үҫемлектәр организмының күҙәнәк ядроһындағы нәҫелгә хас үҙенсәлектәрҙе һаҡлаусы матдә.

**ХРОМОСФЕ́РА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. астр.* Ҡояш атмосфераһының Ҡояш тотолғанда күренә торған ҡыҙыл төҫтәге ҡатламы.

**ХРО́НИК** [*рус.*] *и. һөйл.* Бер үк ауырыу менән йыш ауырыған кеше.

**ХРОНИ́К** [*рус.*] *с. һөйл.* Оҙаҡҡа һуҙыла йәки ваҡыт-ваҡыт ҡабатлана торған. *Хроник ауырыу.*

**ХРО́НИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *тар.* Ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙ теркәп барған тарихи яҙма; йылъяҙма.

**2.** Ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙ тасуир иткән әҙәби әҫәр.

**3.** Периодик матбуғатта, радиола, телевидениела, кинола һ. б. көндәлек ваҡиғалар тураһында ҡыҫҡа хәбәр. *Хроника бүлеге.*

**4.** Ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙ һүрәтләгән документаль фильм.

**ХРОНИКАЛЬ** [*рус.* хроникальный] *с.* Хроника (3, 4 мәғ.) рәүешендәге. *Хроникаль фильм.*

**ХРОНИКАСЫ** *и.* Газета-журналдың хроника бүлегендә эшләүсе. *Хроникасы яҙмалары.*

**ХРОНО́ГРАФ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡыҫҡа ваҡыт араһын йәки төрлө ваҡиға, күренештәрҙе бик дөрөҫ итеп үҙ ваҡытында регистрациялай торған прибор.

**ХРОНОЛОГИК** *с.* Хронологияға мөнәсәбәтле. *Хронологик тәртип. Хронологик эҙмә-эҙлек.*

**ХРОНОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Тарихи ваҡиғаларҙың ваҡыт буйынса эҙмә-эҙлеге, шулай уҡ шул ваҡиғалар даталарының теҙеме. *Мәҡәләләрҙең хронологияһын билдәләү ҡыйын, сөнки улар быуындан-быуынға күсеп, аҙ булһа ла үҙгәрә баралар, йөкмәткеһен яңы социаль-экономик шарттарға ярашлы итеп төрләләндерә киләләр.* Ә. Харисов. / Берәй төрлө күренештәрҙең, ваҡиғаларҙың ваҡыт теҙемендәге эҙмә-эҙлеге.

**2.** Яҙма йәки археологик сығанаҡтарҙы өйрәнеү һәм сағыштырыу нигеҙендә ваҡиға һәм документтарҙың датаһын билдәләй торған ярҙамсы фән.

**ХРОНО́МЕТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Астрономия, геодезия күҙәтеүҙәрендә һәм диңгеҙ эшендә ҡулланыла торған ваҡытты дөрөҫ күрһәткән күсереп йөрөтөлмәле балансирлы сәғәт.

**ХРОНОМЕТРА́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Билдәле бер эшкә киткән ваҡыт күләмен сәғәт ярҙамында билдәләү, иҫәпләү эше. *Хронометраж яһау.*

**ХРОНОМЕТРИК** *с.* Хронометр ярҙамында билдәләнгән.

**ХРОНОСКО́П** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Бик ҡыҫҡа ваҡыт араһын, шулай уҡ ике сәғәттең күрһәткесен йәки сәғәт күрһәткесен радиосигнал ваҡыты менән сағыштыра торған прибор.

**ХРУСТА́ЛИК** [*рус.*] *и. анат.* Күҙҙең ҡараһы артында урынлашып, шуның аша үтә торған нурҙарҙы селтәр ҡатламында фокусҡа йыйып, һындыра торған үтә күренмәле асыҡ, ике яғы ҡабарынҡы есем (линза). *[Врач Носратулла:] Йәшереп тороуҙың кәрәге юҡ: күҙҙәрҙең хрусталиғы боҙола башлаған... Берҙән-бер юл уны алып ташлау.* Р. Ханнанов.

**ХРУСТА́ЛЬ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Нурға уйнап емелдәүе һәм яңғырауыҡлы итеп зыңлауы менән айырылып торған юғары сифатлы быяла; бәлләүер, гәлсәр. // *Хрусталь ваза.*

♦ **Тау хрустале** кварцтың үтә күренмәле төҫһөҙ бер төрө (оптикала һәм ювелир изделиелары яһауҙа ҡулланыла).

**ХУДО́ЖЕСТВО** [*рус.*] *с.* **1.** Сәнғәт өлкәһенә ҡараған, сәнғәт менән бәйле. *Художество мәктәбе. Художество академияһы. Театрҙың художество етәксеһе.*

**2.** Сәнғәт әҫәрҙәренә ҡараған, уның эстетик тәьҫиренә бәйле. *Поэманың художество кимәле. Журналдың художество бүлеге. Яҙыусының художество оҫталығы.*

**ХУДОЖЕСТВОЛЫ** *с.* **1.** Ысынбарлыҡты образдар аша сағылдырған, сәнғәткә, матур әҙәбиәткә бәйле. *Художестволы әҙәбиәт.*

**2.** Сәнғәт әҫәренә хас, ижади эшләнгән. *Художестволы образ.* / Сәнғәт, эстетика талаптарына яуап бирерлек. *Юғары художестволы роман.* ■ *Юғары художестволы әҫәр — ул күп ҡырлы аҫыл таш кеүек. Уның ҡайһы яғына яҡтылыҡ төшөрһәң шул ҡыры нур балҡытып уйнап китә.* М. Минһажетдинов.

**3.** Сәнғәткә хас үҙенсәлектәре булған. *Художестволы гимнастика. Художестволы фото.*

**4.** Сәнғәт өлкәһендәге эшмәкәрлеккә бәйле. *Художестволы үҙешмәкәр коллективы.*

**ХУДОЖЕСТВОЛЫЛЫҠ** *и.* Сәнғәт талаптарына яуап биргән, уның асылын билдәләгән үҙенсәлек. *Беҙҙең прозала художестволылыҡ критерийҙары әле һаман да асылмаған әле.* Р. Шәкүров.

**ХУДО́ЖНИК** [*рус.*] *и.* **1.** Һынлы сәнғәт өлкәһендә ижад итеүсе; рәссам. *Шундай бөйөк художниктар була, ил шаулата улар исеме; үлгәс һәр береһенең өҫтәлендә бөтмәй кала һуңғы рәсеме.* М. Хәй.

**2.** Сәнғәт өлкәһендә ҙур оҫталыҡ күрһәткән кеше; сәнғәт әһеле. *Башҡорт сәнғәтенең ҙур художнигы Арыҫлан Мөбәрәков үҙ ижадының сәскә атыу осорон кисерә.* Ғ. Әхмәтшин.

**ХУЖА** [*фарс.*] *и.* **1.** Берәй нәмәнең биләүсеһе; эйә. *Йөҙөк мең мәшәҡәт менән хужаһына ҡайтарып бирелде.* С. Агиш. *Ә ерҙәр үҙ хужаһына уңыштың мулын бирҙе.* Р. Ниғмәти. *Бара-тора Ирйегет үҙе лә байып, карап хужаһы булып алған.* З. Биишева. / Яллап, эшсе көсө тотоусы кеше. *Ялсының хужаһы.* ■ *Эшсенең теләге хужаның теләгенә ҡапма-ҡаршы була.* Һ. Дәүләтшина. / Йорт-хужалыҡтың биләүсеһе; эйә. *Туҡһан һигеҙ хужаның егерме һигеҙләбе генә тулы надел ер эйәһе.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Йорт, ғаилә башлығы. *Өй хужаһы.* // *Хужа ҡатын.* ■ *Ололай бел хужа ҡаҡын, хөрмәт күрәм тиһәң, маҡта уның атын.* М. Кәрим.

**3.** *һөйл.* Ир (ҡатынға ҡарата). *Хужам һуғышта ятып ҡалды.*

**4.** Хужалыҡ йәки ойошманың етәксеһе; башлыҡ. *Клуб хужаһы. Ферма хужаһы.* ■ *[Ҡарт:] Йән көйөп киткән сакта колхоздың хужалығын әрләп тә ташлайым.* М. Тажи.

**5.** Кем йәки нимәгә етәкселек итерлек власы булған кеше. *Донъяға йәштәр хужа. Илгә хужа булыу.* ■ *Ул минутта бөтә донъяға беҙ хужа инек.* Д. Юлтый. *Хужаһы һин һәр баҡсаңдың, һарай, йорттарҙың.* Ғ. Сәләм.

**6.** Дини хөрәфәт буйынса, нимәгәлер баш булған мифик зат; эйә. *Урман хужаһы. Һыу хужаһы.* ■ *Тау хужаһы таш артына инеп юғалған* (Әкиәттән).

**ХУЖАБИКӘ** *и.* Йорт хужаһының ҡатыны; хужа ҡатын. *Хужабикәбеҙ .. алъяпҡыс быуып, кухнянан өҫтәлгә, өҫтәл янынан кухняға йөрөп тора.* Ф. Иҫәнғолов.

**ХУЖАЛАНЫУ** *к. һөйл.* Хужалы булыу, иргә сығыу. *Ҡыҙым уҡыған ерендә хужаланды.*

**ХУЖАЛЫҠ** *и.* **1.** Теге йәки был ижтимағи-экономик ҡоролоштағы етештереү саралары һәм ысулы. *Социалистик хужалыҡ. Капиталистик хужалыҡ.*

**2.** Эшләп сығарыу, етештереү өлкәһендәге бөтә нәмә йыйылмаһы. *Халыҡ хужалығы. Башҡортостан хужалығы.*

**3.** Эшләп сығарыуҙың бер тармағы, берәмеге. *Ауыл хужалығы. Ҡала хужалығы. Малсылыҡ хужалығы.* / Бер ойошма йәки берәмектең эш башҡарыу өсөн кәрәк булған бөтә нәмәһе. *Мәктәп хужалығы. Цех хужалығы.*

**4.** Ер-һыуы, мал-мөлкәте, ҡорал-ҡорамалы булып, игенселек, малсылыҡ менән шөғөлләнгән бер хеҙмәт берәмеге. *Яңғыҙаҡ хужалыҡ. Вак крәҫтиән хужалыҡтары.* / Малы, йорт-ҡаралтыһы менән айырым йәшәгән ғаилә (күберәк иҫәпләү берәмеге рәүешендә ҡулланыла). *Хужалыҡ хәстәре менән мәшғүл булыу.* ■ *Колхозда бөйөл яңы устав нигеҙендә һигеҙ хужалыҡҡа һыйыр бирелгәс, һыйырһыҙ хужалыҡтар бөтөнләй бөткән.* С. Ҡудаш.

**ХУЖАЛЫҠЛЫ** *с.* **1.** Хужалыҡ тотҡан, хужалығы булған. *Беҙҙең ауылда фәҡир генә хужалыҡлы Хәким бабай бар ине.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** Хужаларса эш иткән, эшкә хужаларса ҡараған; хужалыҡсыл. *Хужалыҡлы кеше.* ■ *Ғәбит ағай кешегә ҡаты булһа ла хужалыҡлы һәм колхоз милкенә ҡул тыҡмай торған кеше ине.* К. Мәргән.

**ХУЖАЛЫҠСЫЛ** *с.* Эшкә хужаларса ҡараған; хужалыҡлы. *Хужалыҡсыл булыу.* ■ *Атты аяй хужалыҡсыл бригадир.* Б. Бикбай.

**ХУЖАЛЫҠҺЫҘ** *с.* Хужалыҡ итеүгә булдыҡһыҙ; бәрәшән. *Хужалыҡһыҙ кеше. Хужалыҡһыҙ булыу.*

**ХУЖАҺЫҘЛЫҠ** *и.* Хужалыҡ эшенә, хужалыҡтағы мал-мөлкәткә хужаларса булмаған мөнәсәбәт. *Ишек, тәҙрә яңаҡтары ҡыйшайған, түбәләрҙән һыу аға... Бөтә ерҙә хужаһыҙлыҡ, тәртипһеҙлек.* Р. Сыртланов.

**ХУЛИГА́Н** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Йәмәғәт тәртибен боҙған кеше. *Хулигандан ҡурҡһаң,— һинән өҫтөн булыр, ә ҡурҡмаһаң — һинең алда меҫкен*

*булыр.* Ҡ. Даян. *Ишектән сығыу менән теге ҡыҙ мине — Бына ултыра үҙе, хулиган! — тип ҡысҡырып ебәрҙе.* Т. Йәнәби.

**ХУЛИГАНЛАНЫУ** *ҡ.* Хулиганлыҡ эшләү, тәртип боҙоу.

**ХУЛИГАНЛЫҠ** *и.* Хулигандарса мөнәсәбәт; хулиган ҡылығы. *Хулиганлыҡ ҡылыу.* ■ *[Әлхәмов бабай:] Хәҙер бит хөкөм эше лә башҡасараҡ. Һуғышып, янъял сығарып, хулиганлыҡ иткән кешене ҡумаҡләп, йыйып хөкөм итәбеҙ.* С. Кулибай.

**ХУНРИЗ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Ҡан түгеүсе, кеше үлтереүсе. *Был Сәйҙәш гәзим баһадир хунриз булды, хәрәмилек әйләне.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ХУНТА** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* **1.** Испан телендә һөйләшкән илдәрҙәге һәр төрлө ижтимағи политик ойошма. *Хунта төҙөү.*

**2.** Латин Америкаһының ҡайһы бер илдәрендә дәүләт перевороты яһап власть башына килгән хәрби хөкүмәт.

**ХУНХУЗ** [*рус.* ⟨ *кит.*] *и.* 19 быуат уртаһынан 1949 йылға Ҡытай Халыҡ революцияһы еңгәнгә тиклем Манжуриялағы юлбаҫар.

**ХУП** [*фарс.*] *мөн.* Бер эшкә ризалыҡ, ҡәнәғәтлек белдергәндә әйтелә; яҡшы. *[Мулла:] Һай, Ғәйни туған, ожмахтың түрендә булғыры. Бик яҡшы, бик хуп. Байҙарҙан да арттырып ебәрҙең әле һин.* Т. Йәнәби. *Хаҡлы тип, беҙҙең теләкте хуп табып, вәғәҙә биргән ике тәңре ҡуптән уҡ.* Ш. Бабич. **Хуп күреү** 1) ыңғай мөнәсәбәт белдереү; хуплау. *Таҙ ханға ҡарап: «Хуп күрһәң, мин бер хәйлә уйлап таптым,» — тине, ти* (Әкиәттән); 2) ярарлыҡ тип табыу. *Барсынһылыуҙың иләҫ күңеле ниндәй батырҙы хуп күрер.* «Алпамыша».

**ХУПЛАНЫУ** *ҡ.* Кемдеңдер тарафынан яҡшы, дөрөҫ тип табылыу. *Ғүмер баҡый баш эйгәндәр, эйеүселәр хупланалар.* Н. Нәжми.

**ХУПЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **хуплау.** *Гөлбөҫтан еңгәй ҡыуаныуынан ни эшләргә белмәй, .. әллә кемдәрҙән үҙҙәренең ошо өлкән эштәрен маҡтатҡыһы, хуплатҡыһы килде.* Ғ. Дәүләтшин.

**ХУПЛАУ** *ҡ.* Дөрөҫ, яҡшы тип табыу; яҡшы күреү, хуп табыу. *Һүҙҙе хуплау. Кешенең фекерен хуплау.* ■ *Аҡназаровтың һаман да өйләнмәй йөрөүен ҡуптәр хупланы.. «Етди егет. Ашыҡмай»,— тип баһаланы.* Ә. Вәли.

**ХУПҺЫНЫУ** *ҡ.* Яҡшы тип табыу; хуп күреү. *Юламан ҡарт был никахты хупһынмай.* З. Биишева.

**ХУР** [1] [*фарс.*] *с.* Кеше алдында түбән, кәм; ҡәҙерһеҙ. *Хур күреү.* ■ *Хур инек, кол инек, беҙ элек.* Т. Йәнәби. *Ҡайҙа ғына йөрөһәң бәхет кәрәк, бәхете бар ирҙәр хур түгел* (Халыҡ йырынан).

□ **Хур булыу** 1) оятҡа ҡалыу. *Зөлхәбирә һылыу үкһеп илай, хур булдым тип кеше ҡаршында* (Халыҡ йырынан); 2) һанһыҙ, ҡәҙер һеҙ хәлгә ҡалыу. **Хур итеү** (*йәки* **ҡылыу**) 1) кеше алдында оятлы итеү; мәсхәрәгә ҡалдырыу. *[Вәли кулак:] Газетаға яҙғандар.., бөтә донъяға хур иткәндәр!* Б. Ишемғол; 2) һанһыҙ, ҡәҙерһеҙ хәлгә ҡалдырыу; мыҫҡыллау. *Иллеләге инәнде хур итмәһендәр тиһәң .. һөйәген ондай төйҙөрөп, көл итмәһендәр тиһәң, үлтер улым фашисты.* Р. Ниғмәти.

♦ **Әҙәм хуры** ныҡ оятлы хәл; әҙәм мәсхәрәһе.

● *Ил барҙа ир хур булмаҫ, ир барҙа ил хур булмаҫ.* Мәҡәл. *Яман ҡатын донъя хуры.* Мәҡәл.

**ХУР** [2] [*ғәр.*] *и.*, **хур ҡыҙы** Мосолман мифологияһы буйынса, йәннәттәге гүзәл ҡыҙ. *Фирҙәүестә бар ине бер хур ҡыҙы, барса хурҙарҙан матур ул бер үҙе.* Ш. Бабич. *Йәмле төн был, серле төн был, бында йәннәт, бында хур.* М. Ғафури.

**ХУРЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Хурлыҡ тойғоһо кисертеү, ғәрләндереү. *Ҡуҙыйкүрпәстең, берҙән, йәтим булыуы, икенсенән, уның шулай урам балаһына әйләнеүе Күсәрханды хурландыра.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ХУРЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **хурлау.** *[Малай:] Беҙҙең әсәләребеҙ немецтарҙың быҫраҡ ҡулдарында хурланып үлтерелде.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ғәрлек, хурлыҡ тойғоһо кисереү; ғәрләнеү. *Зарланмайыҡ, хурланмайыҡ шуның өсөн дә, донъя булғас төрлө хәлдәр була инде.* Б. Бикбай.

● *Хурланып йәшәүҙән дан менән үлеү артыҡ.* Әйтем.

**ХУРЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **хурлау.** *Кешене хурлатыу.*

**ХУРЛАУ** *ҡ.* **1.** Мыҫҡыл итеү, мәсхәрәләү. *[Ҡыҙ — Һәүбәнгә:] Егет һиңә тиң булмам, мине алырға уйлама, нурҙан тыуған тоҡомдо ерҙә йөрөтөп хурлама.* «Аҡбуҙат».

**2.** Ғәйеп-яла тағып кәмләү; яманлау. *Хурлауҙар хур итә алмай, халҡың һөйөп ҙурлаһа.* З. Биишева.

● *Аш хурлама ҡоҫторор, ир хурлама боҫторор.* Әйтем.

**ХУРЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **хурлау.**

**ХУРЛЫҠ** *и.* **1.** Кәмһетелгән, мыҫҡыл ителгән хәл. *Хурлыҡ күреү. Хурлыҡта үткән тормош.* ■ *[Көтөүсе:] Ҡарағөлөмбәт биш йыл буйы ҡуй көттөрҙө хурлыҡ менән.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**2.** Ғәрләнеү тойғоһо; ғәрлек. *Айбулат хурлығынан ҡара янды.. Был ауыр һүҙҙәрҙең сиге булмаҫ кеүек, оҙаҡ күренде.* Һ. Дәүләтшина. *Әжәл көтөп ятыу хурлыҡтыр, ҡорал тотоп үлеү ҙурлыҡтыр.* М. Кәрим. / Оят. *Эшләп табыуҙың ни хурлығы бар, урлау түгел бит ул.* Б. Бикбай. **Хурлыҡҡа төшөү** (*йәки* **ҡалыу**) оятлы булыу, мәсхәрәгә ҡалыу. *[Үмәр:] Башҡа уҡ әҙәмгә һанап, үҙе яусылатҡан булһа, был көнгә, был хурлыҡҡа төшмәй инек.* Һ. Дәүләтшина.

● *Уҡый белмәһәң дә хурлыҡ, уҡып белмәһәң дә хурлыҡ.* Әйтем.

**ХУРЛЫҠЛЫ** *с.* **1.** Хурға ҡалдырырлыҡ, оятлы итерлек. *Хурлыҡлы эш. Хурлыҡлы хәл.*

**2.** Мыҫҡыллы, ғәрләндергес. *Хурлыҡлы һүҙҙәр.*

**ХУТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** (*баш хәреф менән*) *астр.* Ун ике бөрөждөң бере; Дәлү һәм Хәмәл бөрөждәре уртаһында урынлашҡан.

**2.** Ҡояш календары буйынса ун икенсе айҙың ғәрәпсә исеме (22 декабрь — 21 ғинуар осоро).

● *Хутта ике күҙең ут.* Әйтем.

**ХУТЛЫ** *с. һөйл.* Яйға һалынған, көйлө. *[Таҙ] ун бот он ала, май ала, үгеҙҙең бер ботон ашарға ҡалдыра. Хәҙер Таҙҙың эше бик хутлы, ти* (Әкиәттән).

**ХУТОР** [*рус.*] *и. кар.* **утар** 2, 3. *Бер хутор бар. Аҡ хаталар яр буйына теҙелгән. Баксалары сейәлеккә, алмағаска күмелгән.* Ҡ. Даян.

**ХУШ**[1] [*фарс.*] *с.* **1.** Йәнгә-тәнгә ләззәт бирерлек; яҡшы, тәмле (еҫкә ҡарата). *Хуш еҫ.* ■ *Баш аҫтындағы сәскәле бесәндең иҫерткес хуш еҫе беҙҙе иҙрәтеп алып китте.* А. Ғирфанов. *Сәселде хуш һауа, хөр һауа.* Ш. Бабич. / Күңелгә ятышлы; матур, йәмле. *[Ҡоштарҙың] хуш ауаздары .. нисә мәғзүн күңелдәрҙе йыуатыр, шөйлә шат итер.* С. Яҡшығолов. *[Ҡыш] һис бер йәм ҡалмаҫ был хуш туғайҙа.* Д. Юлтый.

**2.** Ҡәнәғәт булған; күтәренке, яҡшы (күңелгә ҡарата). *Хуш кәйеф.* ■ *Китап ҡарау гәҙәтебеҙ буш ваҡытта. Беҙҙән дә белем ишеге бикләнгән юҡ, аңлайбыҙ кәйеф килгән хуш ваҡытта.* Ш. Бабич. *Төштәремдә күрһәм күңелем хуш, уянып та китһәм, ҡуйыным буш* (Халыҡ йырынан). *Ниғмәтулланың .. фекере йыйылыш тарафынан хуш ҡылын[ды].* З. Шәрҡи.

**3.** *мөн. мәғ.* Кеше һүҙен иғтибарға алғанды белдереп, ары дауам итергә өндәр өсөн әйтелә; ярар, йә шунан. *Хуш, тағы ни әйтерһең?*

♦ **Хуш булыу** риза, ҡәнәғәт булыу. *Барына хуш булып, хужаға дуҫ булып, .. эсеп тә ебәр туҫтаҡты* (Халыҡ йырынан). **Хуш килеү** ярашлы булыу, оҡшау. *Ҡала .. егет күңеленә бик тә хуш килде.* Б. Рафиҡов. **Хуш күреү** (*йәки* **табыу**) яҡшы тип табыу, оҡшатыу.

● *Ҡарғаның үҙ тауышы үҙенә хуш.* Әйтем. *Эшләмәй күңел хуш булмаҫ.* Әйтем.

**ХУШ**[2] [*фарс.*] *и.* (*йәки* **хушығыҙ**) Хушлашҡанда, һаубуллашҡанда әйтелгән әҙәп һүҙе. *Хуш, иҫән бул.* ■ *Йә, Сәйҙел, хуш. Осрашырбыҙ ҡалам — Өфөлә.* Ғ. Сәләм. *[Эткол бай:] Әле хуш юҡ. Ҡайтанан рәтләп ултырышығыҙ. Хөрмәт бөтмәгән.* Т. Хәйбуллин.

□ **Хуш бул (булығыҙ)** хушлашҡанда, һаубуллашҡанда әйтелә. *Хуш бул, әсәй, ташлап китәм һине.* Ғ. Амантай.

♦ **Хуш аяғы** ҡунаҡты оҙатҡанда бирелгән һый. **Хуш көрәгәһе** туй йәки мәжлес тамамланғанда хужа тарафынан сығарылған һуңғы көрәгә. **Хуш итеү** 1) *дини* ашап бөткәс амин тотоу; фатиха ҡылыу. *Хуш итмәй тороп китеү*; 2) хужаға рәхмәт әйтеп һаубуллашыу. **Хуш килдең** (*йәки* **киләһең**) хөрмәтләп ҡаршылағанда әйтелә. *[Әбей:] Хуш киләһең, егет, әйҙә, түрҙән уҙ* (Әкиәттән).

**ХУШБУЙ** [*фарс.*] *и.* Өҫ-башҡа һөртә торған хуш еҫле шыйыҡ нәмә; еҫле май. *Хушбуй еҫе. Хушбуй һөртөү.— Айсыуаҡтың ишектән атлауы булды, әллә ҡайҙан, хушбуй һипкән һымаҡ, хуш еҫ бөркөлдө.* Ф. Рәхимғолова.

**ХУШБУЙЛАНЫУ** *ҡ.* Хушбуй еҫе һеңеү. *Хушбуйланған кейем.* ■ *Бүлмәләрҙә — ертеl күп һуланым хушбуйланған тынсыу һауаны, Ярты ғүмер юлда үткән икән, юлда үтһен инде ҡалғаны.* Ә. Атнабаев.

**ХУШБУЙЛАУ** *ҡ.* Хушбуй һөртөү, хушбуйлы итеү. *Кейемде хушбуйлау.*

**ХУШ-ВАЙЫМҺЫҘ** *с.* Эш-хәстәр белмәҫ; бошмаҫ. *Хуш-вайымһыҙ кеше. // Хуш-вайымһыҙ йәшәү.*

**ХУШЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Ҡәнәғәт, риза итеү, кинәндереү. *Күңелде хушландырыу.* ■ *Ҡустым, быңдай мажаранан ҡотолғандан һуң быңа был быяла йортҡа инеп, саҡ ҡына булһа ла нәпсене хушландырып сыҡмай ярамаҫтыр.* Д. Исламов.

**ХУШЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡәнәғәт, риза булып ҡыуаныу; кинәнеү. *Күңел хушлана.* ■ *Ҡасан ғына әле йылына күп тигәндә ике-өс повесть менән хушланған саҡтар бар ине.* Ғ. Хөсәйенов. *Сәхрәләргә сығып йөрөгәнемдә хушланамын ҡоштар тауышына* (Халыҡ йырынан).

**ХУШЛАШЫУ** *ҡ.* Айырылышҡанда иҫәнлек-һаулыҡ теләү; һаубуллашыу. *Хушлашып китеү. Ҡул биреп хушлашыу. Хушлашыу кисәһе.* ■ *Сеңләү, гәҙәттә, кейәүгә оҙатылған ҡыҙҙың ата-әсәһе, туғандары менән хушлашыу ваҡытында башҡарыла.* М. Сәғитов. / Айырылышып китеү. *Ауыл менән хушлашыу.*

♦ **Донъя менән хушлашыу** вафат булыу, теге донъяға китеү; үлеү.

**ХУШТЫҠ** *и. диал.* Егет өйөнән ҡоҙаларҙы оҙатыу мәжлесе. *Хуштыҡҡа йыйылыу. Хуштыҡ ашы.*

**ХУШҺЫНДЫРЫУ** *ҡ.* Ҡәнәғәтлек, ризалыҡ тойғоһо уятыу. *[Ҡустым] Рамил бәләкәй шул әле — алтыла ғына. Уның менән уйнау мине бик үк хушһындырмай.* Н. Мусин.

**ХУШҺЫНЫУ** *ҡ.* **1.** Күңелгә оҡшатыу; яратыу. *Миңлекамал менән Шафиҡ араһындағы мөнәсәбәт .. яҡшырманы. Ҡатыны Шафиҡты хушһынмаған кеүек тойолдо.* Я. Хамматов. *Ялан ғына ерҙе ай хушһынмай, тышау менән ҡайта тау малы* (Халыҡ йырынан). / Һанға һуғыу, иҫәпләшеү. *Үгәй әсә тип балалар хушһынмай.*

**2.** Риза, ҡәнәғәт булыу. *Хушһынып ашау.*

**ХЫЗЫР** *и.*, **хызыр Ильяс** *иҫк.* Дини ҡараш буйынса, алама кейемдә халыҡ араһын ҡыҙырып, кешеләргә изгелек эшләп йөрөгән пәйғәмбәр исеме. *[Бәхтиәр бабай:] Мин үҙ һүҙле, тырыш кешеләрҙе яратам. Ундайҙарға мин, хызыр Ильяс кеүек, һәр ваҡыт ярҙам итергә әҙер.* И. Ғиззәтуллин.

**ХЫЛАПА** *с. диал.* Әрпеш. *Хылапа ҡатын. Хылапа булыу.*

**ХЫНСАР** *и. диал.* Башбармаҡ.

**ХЫР** *оҡш.* Тамаҡ төбөнән ҡалтырап сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ.

**ХЫРЛАУ** *ҡ.* Хыр-хыр итеү; хырылдау. *Минең йоҡо ҡасты. Хужа байтаҡ ыңғырашып ятты ла хырлап йоҡоға китте.* Д. Юлтый.

**ХЫР-ХЫР** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат хыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Хыр-хыр итеү. Хыр-хыр килеп йоҡлау.*

**ХЫРЫЛДАУ** *ҡ.* Хыр-хыр итеү, хырлау. *Хырылдап йоҡлау.*

**ХЫРЫЛДАУЫҠ** *с.* Тамаҡ төбөнән хырылдап сыҡҡан. *Яралы .. ике ҡулымды ла һәрмәп тотоп алды һәм тулҡынланған хырылдауыҡ тауыш менән һөйләп китте.* Д. Юлтый.

**ХЫТ** [*рус.* хоть] *киҫ. һөйл.* Айырым баҫым менән әйтелеп һүҙҙең мәғәнәһен көсәйтә; йә, йә булмаһа, теләйһең икән. *[Ричард:] — Беҙгә осорға кәрәк. [Айгөл:] Осорға? Ҡайҙа осорға? — Ҡайҙа булһа ла, хыт айға..* М. Кәрим.

**ХЫЯЛ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ысынбарлыҡта булмаған, күңелдә генә барлыҡҡа килгән уй. *Матур хыял. Татлы хыял. Буш хыял. Хыялға бирелеү.* ■ *Хыялдарға сумып ултырҙым мин Ирәндектең бейек ташында.* С. Кулибай. *Ниндәй йәшел донъя! Күкһел Урал! Иҙел аға таҫма шикелле. Бер ҡош булып осорғамы әллә, ҡуйсы, хыял, был һуң мөмкинме?* К. Кинйәбулатова.

**2.** Күҙ алдына килтерелгән образдарҙың уйҙа, күңелдә барлыҡҡа килеүе. *Хыялға батыу.* ■ *Мин хәҙер бөтә хыялдан буш. Башҡа бер төрлө лә уй килмәй.* С. Агиш. *Моңһоу мәлдәремдә хыял аша икәү уҙған эҙгә ҡарайым. Йәшлегемә нисек ҡайтайым да, нисек һине эҙләп табайым?* А. Игебаев. / *шиғр.* Ошо уйҙар, образдар ятҡан күңел түре. *Хыялда йөрөтөү. Хыялда һаҡлау.* ■ *Нурлы йөҙөң, бөҙрә сәсең менән хыялымда ултырып бараһың.* М. Хәй.

**3.** Күңел теләгән уй, фекер; теләк, ынтылыш. *Уҡырға булған хыял. Хыял менән йәшәү. Хыял тормошҡа ашыу.* ■ *Минең менән хыял булмаһа бергә, китер инем быға саҡлы кәбергә.* М. Ғафури. *[Һаҙи:] Күпселек балалыҡ хыялдары тормошҡа ашмағай кеүек, минең хыялым да хыялда ғына ҡалды.* И. Абдуллин. / Үҙенә тартҡан, нимәһе менәндер мауыҡтырған нәмә. *Өфө бер саҡ хыял ине, беҙҙең өсөн әллә нисә йөҙ тауҙар, йылғалар артындағы кеүек әкиәттәге һымаҡ алыҫ ине.* С. Агиш. *Ҡырым — хыял ине, хәҙер инде Сәйҙелдәр Ялтала ял итә.* Ғ. Сәләм.

**4.** Тормошта булмаған нәмә, буш уй; уйҙырма. *Бабайҙарға хыял булһа ошо дәүер, уларҙың саф хыялдары тормош хәҙер.* С. Кулибай. *Ш. Бабичтың тәбиғәт лирикаһында ла беҙ әкиәттәгесә ауан хыялды мәҫәлдәгесә йәшерен аллегорияны яҡшы күрәбеҙ.* К. Әхмәтйәнов.

□ **Хыял итеү** нимәгәлер өмөтләнеп теләү; хыялланыу.

**ХЫЯЛАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Хыял. *Хыялатта йөрөтөү.*

**ХЫЯЛИ** [*ғәр.*] *с.* Хыялға мөнәсәбәтле, хыялға нигеҙле. *Хыяли уй. Хыяли һүрәт.*

**ХЫЯЛЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Һәр төрлө хискә, хыялға (1 мәғ.) бирелеү. *Ни генә булмаһын, Рахман уйланырға, хыялланырға ярата.* Ә. Вәли. *Ғәжәпләнмә тәүге ҡарҙар яуған саҡта хыялланһам, күкрәгемдән ташып сыҡҡан хистәремде тыя алмаһам.* Ф. Рәхимғолова.

**2.** Ниҙер тураһында уйлау, уй-фекер йөрөтөү. *Бер нур булып ерҙә йәшәнең һин хыялланып тормош турында.* В. Әхмәҙиев. / Көслө теләк, ҙур өмөт менән яныу, нимәгәлер ҙур ихласлыҡ менән ынтылыу. *Архитектор булырға хыялланыу.* ■ *Алма баҡсаһы ҡороп ебәрергә хыяллана ине ул [Зариф ҡарт.].* Б. Бикбай. *[Тайморзин:] Мин һеҙҙең ҡулығыҙҙы ҡыҫырға күптән хыяллана инем.* М. Тажи. *Хыялландың кешелекте йәшәтергә мәрмәр һарайҙа.* М. Кәрим.

**3.** Күп уйлап аҡылға зәғифләнеү; хыялыйланыу. *Ҡайғынан хыялланыу.*

**ХЫЯЛЫЙ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Реаль булмаған, хыял (1 мәғ.) тыуҙырған. *Хыялый донъя.* ■ *Әллә ҡайҙан үтте һөйөү юлым, ул хыялый, борма юл ине. Йән тетрәтеп килде ысын һөйөү, килде, ләкин һуң ине.* Н. Нәжми.

**2.** Хыялға бирелгән, хискә иҫергән. *Хыялый кеше. Хыялый баш.* ■ *Матурлығың — минең хыялым ул, хыялый бер күңел емеше.* Р. Ғарипов.

**3.** Күп уйлау арҡаһында аҡылына зыян килгән, аҡылдан яҙған. *Хыялыйға әйләнеү.* ■ *Хыялыйҙың зәғиф мейеһендә ниндәйҙер фекерҙең ярала алмай ыҙалауы күренеп тора ине.* Й. Солтанов. *Хыялыйҙар булам инде, һинең хаҡта күп уйлап* (Халыҡ йырынан).

**ХЫЯЛЫЙЛАНЫУ** *ҡ.* Күп уйлап хыялыйға (3 мәғ.) әйләнеү, аҡылға зәғифләнеү. *Хыялыйланып йөрөү.* ■ *Билдәһеҙ йырсы тураһында, әлбиттә, төрлө һүҙ йөрөнө. Берәүҙәр уны фәлән-фәлән ауылдағы хыялыйланған бер кеше икән тип һөйләне.* Ә. Вахитов.

**ХЫЯНАТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Тәртип-ҡанунға ҡаршы килгән, уны боҙған эш. *Законға хыянат яһау.* / Ил-халыҡ, дуҫ-туғанлыҡ, теләктәшлек мөнәсәбәтенә зыян итеп, дошман файҙаһына ҡылған эш. *Ҡурҡаҡлыҡтан хыянатҡа ла, енәйәткә лә бер генә аҙым шул.* З. Биишева. *Пленға бирелеүҙе һалдат хыянат һанай ине.* С. Ҡудаш.

**2.** Антты, һүҙҙе йәки кемдеңдер ышанысын боҙған ҡылыҡ. *Аманатҡа хыянат — намыҫһыҙ кешенең эше.* ■ *[Татьяна:] Мин партия алдында хыянат эшләгән булһам, уның язаһын алырға тейешмен.* Р. Ниғмәти. / Ғаиләгә йәки мөхәббәткә ҡарата ҡылынған тоғроһоҙлоҡ. *Һаҡла ҡыҙҙы яман күҙҙән, хыянаттан — тоғро йәрҙе, етемлектән — сабыйҙарҙы, буш һүҙҙәрҙән — шағирҙарҙы.* Р. Бикбаев.

□ **Хыянат итеү** (*йәки* **ҡылыу**) 1) тоғролоҡто боҙоу. *Илгә хыянат итеү. Хәҡиҡәткә хыянат итеү;* 2) антты, ышанысты боҙоу. *Һүҙгә хыянат итеү.* ■ *Хыянат ҡылғандарың иҫкә төшһә, илаймын күңелем боҙолоп ҡабат-ҡабат.* Аҡмулла.

● *Аманатҡа итһәң хыянат, алырһың ғүмерлек яманат.* Әйтем.

**ХЫЯНАТЛЫ** *с.* Хыянатҡа нигеҙләнгән, тоғролоҡто боҙған. *Хыянатлы эш.*

**ХЫЯНАТЛЫҠ** *и.* Хыянатҡа бәйле, хыянатлы эш. *Ерҙең йәме ниндәй кәмер ине, был нурҙары уның булмаһа. Улар мәңге хыянатлыҡ ҡылмаҫ, үҙең хыянатлыҡ ҡылмаһаң.* Р. Бикбаев.

**ХЫЯНАТСЫ** *и.* **1.** Хыянат эшләгән кеше; һатлыҡ йән. *Хыянатсы булыу.*

**2.** Үҙенең һүҙенә, кешенең ышанысына хыянат иткән кеше. *Бураншаның кәләшен алып, бер төндә Ирйегет ҡасып китә.. Ҡурҡаҡтан хыянатсыға әйләнә.* З. Биишева.

**ХЫЯНАТСЫЛ** *с.* **1.** Хыянат итә торған, хыянат итеүсән. *Хыянатсыл кеше.*

**2.** Хыянатсы кешегә хас. *Хыянатсыл һөжүм.* ■ *Ҡыҙыл байраҡтар Львов ҡалаһы янында уҡ елберҙәй башланы. Бына шул ваҡытта Троцкий Атлы армияны икенсе яҡҡа бороп ебәреү тураһында үҙенең хыянатсыл приказын бирҙе.* Ш. Шәһәр.

**ХЫЯНАТСЫЛЛЫҠ** *и.* Хыянат итеүселек. *[Бураншы] Бөтә ышанысты хөрмәт, ихтирамды аяҡ аҫтына һалып тапаны. Ҡурҡаҡлыҡтан хыянатсыллыҡҡа, мәкерлеккә хәтле тәгәрәп төштө.* З. Биишева.

**ХЫЯНАТҺЫҘ** *с.* Хыянат итмәй торған, эскерһеҙ; тоғро. *Хыянатһыҙ күңел.*

**ХӘБЕЛӨЛМӘТИН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Элемтә, ныҡлы бәйләнеш. *Милләттәштәр! Иттифаҡҡа беҙ киләйек, хәбелөлмәтин сөлүкенә беҙ теҙеләйек.* С. Яҡшығолов.

**2.** Һаулыҡ, именлек теләп әйтелә. *Форсат булһа, гилем, һөнәр, кәсеп ҡыл һин, донъя ахирәт булһын һиңә, хәбелөлмәтин.* М. Ғафури.

**ХӘБЕС** *и. иҫк. ҡар.* **хибес.**

**ХӘБЕСХАНА** [*ғәр.* + *фарс.*] *и. иҫк. кит.* Төрмә. *Хәбесханаға ябыу.*

**ХӘБИП** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Яратҡан, һөйөлгән кеше. *Хәбибеңдер ул Мөхәммәт, беҙҙе ҡылғыл уға өммәт* (Халыҡ шиғырынан).

**2.** Дуҫ, әшнә.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ХӘБИҪ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Бысраҡ, әшәке, насар. *[Ендәр] йыйылышып, һәр барыһы ла килделәр Иблис хәбиҫтең ҡаршына.* Ш. Бабич.

**ХӘБӘР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ниҙер тураһында ишетелгән йәки ишеттерелгән һүҙ, мәғлүмәт. *Шатлыҡлы хәбәр. Ҡайғылы хәбәр. Хәбәр алып килеү.* ■ *Баташ төшөрөлөү тураһындағы хәбәр Өфөгә бик тиҙ килеп етте.* Ғ. Әмири. *Ел таратып йөрөй имен хәбәр, донъялағы таныш-белешкә.* М. Кәрим. **Хәбәр һалыу** ҡапыл бер хәбәр ишеттереү. *Баярҙың ҡыҙы .. быларҙы күреп ҡала ла, шул арала атаһына килеп хәбәр һала.* М. Тажи. / Хәл-әхүәл тураһындағы белешмә, хат. *[Саматтарға] оло ағаһының үле хәбәре килде.* Д. Исламов.

**2.** Ниндәйҙер хәл-ваҡиғаға бәйле яңылыҡ, мәғлүмәт. *Ялан хәбәрҙәре.* ■ *Мәскәүҙән диктор фронт хәбәрҙәрен тапшыра, урам буйлап китеп барыусылар, бер аҙ туҡталып, радиоға ҡолаҡ һалып үтә.* М. Тажи. / Кем йәки ниҙер тураһындағы белешмә; мәғлүмәт. *Ситкә китеүҙәре хаҡында хәбәрем бар.* ■ *Аллаяр мулланың бөйөк грек шағиры Гомер тураһында хәбәре юҡ.* Ш. Шәһәр.

**3.** Ваҡытлы матбуғат йәки радиоға урындан килгән мәҡәлә һәм корреспонденция. *Хәбәр баҫыу. Хәбәр тапшырыу. Хәбәр уҡыу. Хәбәр яҙыу.* ■ *Хәйҙәр менән бөгөн стена газетаһы сығарҙыҡ. Ул хәбәрҙәрҙе төҙәтеп биреп тора, мин ҡара тушь менән яҙам.* М. Тажи.

**4.** *грам.* Һөйләмдең эйә тураһында ни ҙә булһа белдергән баш киҫәге. *Ҡушма хәбәр. Ябай хәбәр.*

□ **Хәбәр итеү** (*йәки* **биреү**) ниҙер тураһында белдереү, ишеттереү. *Хат аша хәбәр итеү.* ■ *[Телеграммала] Гәрәй Шаҡмановтың лагерҙан ҡасыуын хәбәр иттеләр.* Б. Бикбай. *Күҙәтселәр хәбәр бирҙе: „Саң күрҙек“,— тип.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

♦ **Ауыҙҙы тулы хәбәр** һүҙ йөрөткән, ғәйбәт һөйләгән кешегә ҡарата әйтелә. **Хәбәр һөйләм** *лингв.* реаль ысынбарлыҡтағы нәмәләр, күренештәр, хәл-ваҡиғалар тураһында хәбәр иткән һөйләм. **Хәбәр һөйкәлеше** *лингв.* эш-хәрәкәттең хәҙерге, киләсәк, үткән заманда һөйләүсе тарафынан ысын көйө ҡабул ителеүен белдергән һөйкәлеш формаһы. **Хәбәр эйәрсән һөйләм** *лингв.* баш һөйләмдең хәбәре вазифаһын үтәгән шул, шунда, шундай, шулай һүҙҙәрен асыҡлай торған эйәрсән һөйләм. **Хәбәр эйәһе менән йөрөмәй** *ҡар.* **эйә.**

**ХӘБӘРҘАР** [*ғәр.* + *фарс.*] *с. кит.* Берәй эш йәки ваҡиға тураһында мәғлүмәтле. *Кантон башлығы итеп грамоталы һәм мәғариф эшенән әҙме-күпме хәбәрҙар кешеләр ҡуйылған.* Ә. Харисов. *Бындай ваҡиғалар хаҡында хәбәрҙар булып тороу Кинйә өсөн дә кәрәк ине.* Ғ. Ибраһимов.

**ХӘБӘРЛЕ** *с. ҡар.* **хәбәрҙар.**

**ХӘБӘРЛӘҮ** *ҡ.* Хәбәр итеү, һөйләү. *Ер тыныс түгел әле, әллә ҡайҙан елдәр иҫеп, шомло хәлдәр булыуын хәбәрләй.* Ғ. Хөсәйенов.

**ХӘБӘРЛӘШЕҮ** *ҡ.* Үҙ-ара алышыу; хәбәр итешеү. *Богданов рация буйынса теге яҡ менән хәбәрләшеп алды.* Д. Исламов.

**ХӘБӘРНАМӘ** [*ғәр.* + *фарс.*] *и. иҫк. кит.* Яҙма белдереү, хәбәр.

**ХӘБӘРСЕ** *и.* **1.** Ниҙер тураһында хәбәр килтереүсе. *Хәбәрсе булып килеү.* / *күсм.* Нимәләр тураһында алдан белдереүсе, һиҙҙереүсе. *Таң хәбәрсеһе. Ҡыш хәбәрсеһе.* ■ *Тиҙҙән .. торналар, көҙ етеүҙең тәүге хәбәрселәре булып, йәтмә һымаҡ теҙелеп, көньяҡҡа юл алырҙар.* Д. Исламов.

**2.** Ваҡытлы матбуғат йәки радиоға яҙышып торған кеше; корреспондент. *Ауыл хәбәрсеһе. Штаттан тыш хәбәрсе.* ■ *Хәбәрсе Аҡбашта биш көн торҙо.. Факттарҙы бик ентекләп тикшерҙе.* Ә. Вәли.

**ХӘБӘРСЕЛ** *с.* Һүҙгә, һөйләшергә әүәҫ. *Хәбәрсел кеше.*

**ХӘБӘР-ХӘТЕР** *и. йыйн.* Хәл-әхүәл тураһында һүҙ; төрлө хәбәр. *Хәбәр-хәтер ишетелмәй. Хәбәр-хәтерһеҙ юҡ булыу.* ■ *Ауыл араһына сығып, тегенеһенән дә, быныһынан да, күрше ауылдан килгәндәрҙән дә һораштырып ҡараным. Хәбәр-хәтер юҡ.* Н. Мусин. / Яҙма хәбәр, хат. *Хәбәр-хәтер килеү.* ■ *Ашыҡ әйҙә, почтальонка, тиҙерәк илт һин кешеләргә хәбәр-хәтерҙе.* М. Дилмөхәмәтов.

**ХӘБӘРҺЕҘ** *р.* **1.** Хәбәр итмәй, белдермәй. *Хәбәрһеҙ йөрөү. Хәбәрһеҙ ҡайтып килеү.* ■ *Шәғәли ауылынан бик йәшләй сығып китеп, хәбәрһеҙ оҙаҡ юғалып йөрөгән.* Б. Бикбай.

**2.** Бер ниндәй хәбәр алмай, бер ни белмәй. *Ауыр ине оҙатыу. Тағы ла ауыр бер хәбәрһеҙ көтөп йәшәүе.* Р. Сафин. / Билгеһеҙ рәүештә, эҙһеҙ, бөтөнләй. *Хәбәрһеҙ ғәйеп булыу.* ■ *Әсәнең яңғыҙ ғына улы булған, юғалған ул яуҙа хәбәрһеҙ.* Ш. Биҡҡол.

**ХӘБӘШ** [*ғәр.*] *иҫк. кит.* Эфиопия кешеһе, негр.

**ХӘБӘШИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Эфиопия кешеһенә бәйле.

**2.** Ҡара тәнле. *Хәбәши ҡол.*

**ХӘДИМ** *и. иҫк. кит.* Хадим.

**ХӘДИС** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Дини ҡараш буйынса, Мөхәммәт пәйғәмбәр әйткән һүҙҙәр. *Хәдис китабы. Хәдис тыңлау.* ■ *.. Мулла ни һөйләр икән? Бына быныһы ҡыҙыҡ. Ат бирмәйенсә үлектәрҙе күммәйбеҙ тиһә, был инде алланың күрьәнендә лә, пәйғәмбәрҙең хәдистәрендә лә юҡ.* Б. Ишемғолов. / Шул һүҙҙәр йыйылмаһынан

торған дини дәреслек. *Дауыт ике ҡыш һабаҡҡа йөрөй. Ул хәҙер хәдис, мохтасар кеүек «фәндәрҙе» үҙләштереп, өлкән шәкерт булып ала.* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ХӘҘЕР** [*ғәр.*] *р.* **1.** Һөйләү процесы барған ваҡытта, ошо мәлдә. *Зәйнәп инде хәҙер студентка, вузда уҡый хәҙер Зәйнәбем.* Ғ. Сәләм. / Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә; тиҙ генә. *[Бибисара:] Туҡта, мин хәҙер генә, йәһәт кенә Иштуған кейәүгә барып киләйем.* З. Биишева.— *Хәҙер ҡаҙанға ит һал, әйҙә, бер юлға Ғәләү ҙә беҙҙең менән бергә ашаһын.* Т. Йәнәби. / Тиҙҙән, ошо яҡын арала. *Хәҙер килер.* ■ *[Гөлйөҙөм:] Хәҙер бына ағайың тартып бөтһөн дә, тәмле итеп аш бешерербеҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ниҙеңдер артынса, шунда уҡ, бик тиҙ, ҡапыл. *Һүҙ күтәрмәй, хәҙер үпкәләргә тора.* ■ *Келәт бағанаһына аҫып ҡуйылған ике һабан төрәненә һуғып та өлгөрмәйһең, хәҙер йыйылышып китәләр.* Б. Бикбай.

**3.** *диал.* Әҙер. *Хәҙер булыу. Хәҙер тороу.*

**ХӘҘЕРГЕ** *с.* **1.** Һөйләү процесы барған саҡтағы, ошо ваҡыттағы, ошо мәлдәге, әлеге. *Хәҙерге минутта һәр бер һүҙ артыҡ, килешһеҙ.* Д. Юлтый.

**2.** Ошо дәүерҙәге, был заманға ҡараған. *Хәҙерге башҡорт теле. Хәҙерге фәнни ҡаҙаныштар.* ■ *Фольклор борон заманда .. хәҙерге яҙма әҙәбиәт ролен үйнаған.* Ғ. Амантай. / Бөгөнгө көндәге, әле йәшәп килгән. *Хәҙерге йәштәр. Хеҙерге ауыл тормошо.* ■ *Борон заманда, ҡалын урманда, хәҙерге Ҡариҙелдең башында йәшәгән, ти, бер батыр* [Әкиәттән].

♦ **Хәҙерге заман** *лингв.* эш йәки хәлдең башҡарылыуы һөйләү моментына тура килеүен йәки даими булыуын белдергән заман формаһы.

**ХӘҘЕРГӘ** *р.* Күпмелер ваҡытҡа тиклем. *Ә беҙҙең группа халҡы өсөн Висла буйы курорт булды. Беҙҙең интәштәр хәҙергә һуғыш тураһында баш ватмай.* Д. Юлтый. / Ошо ваҡытта, әле, хәҙер. *Хәҙергә хуш!* ■ *Хәҙергә ауыл ярлылары советҡа күп кенә килә. Әгәр улар өсөн берәй файҙалы эш эшләмәһәк.., беҙҙә лә башларҙар.* Ғ. Дәүләтшин.

**ХӘҘЕРГӘСӘ** *р.* Хәҙерге көнгә тиклем. *Хәҙергәсә хәбәр-хәтер юҡ.*

**ХӘҘЕРЛӘНЕҮ** *ҡ. диал.* Әҙерләнеү.

**ХӘҘРӘТ** [*ғәр.*] *и. дин.* **1.** Махсус дини белеме булған дәрәжәле мулла. *Бушты һөйләйһең дә баһа, килен, гөнаһлы булып, Хәҙрәт менән сағыштырырға яраймы ни, уның өйөндә шурлек тулы көрьән, үҙе көнө-төнө намаҙ уҡый. Унан нишләп фирештә касһын, ти?* Т. Йәнәби. / Дин әһелдәренә ололап әйтелгән һүҙ. *Ишан хәҙрәттәре.* ■ *[Ольга ханым:] Мырҙабулат, аҡсаларыңды һин таратып сыҡ. Ә Ҡолош, Хөснөтдин, Ханнан, Хөсәйен хәҙрәттәргә бирәр тана һыйыр биреп ҡайтар.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *гәҙәттә күпл.* Юғары дәрәжәләге кешеләрҙе ололап, ҙурлап әйтә торған һүҙ; эфәнде. *Батша хәҙрәттәре. Старшина хәҙрәттәре.* ■ *[Аҫылбай:] Кантон хәҙрәт, улар бит мине һоратып алдырҙылар. Мин бармаҫҡа ҡырғалашһам да булдыра алманым.* Д. Юлтый.

**ХӘЖӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кем йәки ниҙеңдер кәрәклеге, уға булған мохтажлыҡ. *Һәр нәмәнең үҙ хәжәте бар. Ҡар яуҙы арбаға хәжәт бөттө. Был эштең хәжәтен күрмәйем. Көтөп тороуҙың хәжәте ҡалманы.* ■ *[Саматтың] минән башҡа бер кешегә лә хәжәте юҡ. Мин эҙләмәһәм .. уны кем эҙләһен.* Ә. Бикчәнтәев. / *с. мәғ.* Талап ителгән; кәрәкле. *Хәжәт кеше. Хәжәт нәмә.* // *Хәжәт күреү. Хәжәт табыу.* ■ *[Хәҙрәт:] Хәжәттән артыҡ байлыҡ — әҙәм балаһы өсөн сир ул.* С. Мифтахов.

**2.** Кемгәлер төбәлгән үтенес, йомош. *Хәжәт төшөү.* ■ *[Табипсы:] Минең бер хәжәтем бар, ана ошоно эшләһәгеҙ генә ҡыҙығыҙҙы дауа-дарман итәм* (Әкиәттән). / *һөйл.* Бурыс, үтес. *Хәжәткә алыу. Хәжәткә биреү. Алған хәжәтте түләү.*

**3.** *һөйл.* Кешеләге тәбиғи йомош. *Хәжәткә сығыу.* ■ *Ул [офицер] тәбиғи хәжәтен үтәр өсөн арыраҡ атланы, елгә арты менән тороп баҫты.* Ә. Харис.

♦ **Бик хәжәте бар ине** *йәки* **хәжәте бер тин** кәрәге юҡ тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Хафиз мөтәүәллигә:] Төкөрәм мин һинең мәсетеңә, бик хәжәте бар ине! — тип әйткән ти ул.* В. Исхаков. **Ни хәжәт** ни файҙа, файҙаһыҙ тигән мәғәнәлә әйтелә. *Уны алып барыуҙан ни хәжәт?* **Ни хәжәтемә** эш-хәлдең файҙаһыҙға булғанына үртәнеп әйтелә. *Эш башламағас, ни хәжәтемә тип иртә килдегеҙ?* **Хәжәте үҙе кеүек** кем йәки нимәнеңдер баһаһын түбән итеп күрһәткәндә, уға мохтажлыҡ юҡлығын белдергәндә әйтелә.

**ХӘЖӘТХАНА** [*ғәр.* + *фарс.*] *и. иҫк.* Бәҙрәф, эбрәкәй.

**ХӘЗИН** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ҡайғылы, хәсрәтле. *Шул минутта хәзин күңелең шатланыр, күҙҙәреңдә мәңге һүнмәҫ дәрт яныр.* С. Ҡудаш.

**ХӘЗӘН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡайғы, хәсрәт. *Ниңә хәҙер был донъяны хәзән, гәм каплаған?* С. Яҡшығолов.

**ХӘЙЕЗ** [*ғәр.*] *и. диал.* Айлыҡ, күрем.

**ХӘЙЕР** [1] [*ғәр.*] *и.* **1.** Яҡшылыҡ, изгелек, файҙа. *Малдың хәйерен күреү.* ■ *Билал .. гәжәпкә ҡалды, эсенән генә: «Бындай кешеләрҙән төҙөлгән дружинаның ниндәй хәйере булыр, ниндәй файҙаһы тейер икән?» — тип һөйләнде.* А. Таһиров. / *с. мәғ.* Яҡшы, һәйбәт; хәйерле. *Һиңә аҡылың әйтер: «Большевиктар юлы хәйер»,— тип* Ш. Бабич. *Таң да яҡын. Юлсының бит юлда булғаны хәйер.* С. Кулибай.

**2.** *дини* Алланың ярлыҡауын һорап, доға ҡылдырып биргән нәмә. *Хәйер аҡсаһы. Хәйер өләшеү. Хәйер таратыу. Хәйер алыу.* ■ *[Һалдатка] китеүселәр .. мулла янына инеп хәйер биреп, доға алдылар.* Һ. Дәүләтшина. **Хәйер һорау** (*йәки* **һорашыу**) һоранып тамаҡ туйҙырыу, теләнселәү, һораныу. *Бик хәйерсе булған халҡым, тик хәйер һорашмаған. Билгә ҡылыс таҡҡан, шуға арҡаға тоҡ аҫмаған.* М. Кәрим. **Хәйер эстәү** теләнселәү, һораныу. *Хәйер эстәп тамаҡ туйҙырыу.*

♦ **Әбелхәйер хәйере** биргән нәмәһен, әйткән вәғәҙәһен кире алған кешегә көләп әйтелә.

● *Хәйләле эштә хәйер юҡ.* Мәҡәл.

**ХӘЙЕР** [2] [*фарс.*] *иһш.* Тәүге фекерҙе ҡапыл үҙгәртеп, икенсе йүнәлеш биргәндә белдерә. *Тәүге көндәрҙәге кеүек шаян һүҙҙәр ҙә ишетелмәй, хәйер, уға ваҡыт та юҡ инде.* М. Ғәли. *Дейеү егеттән иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡан: «Нихәл, ҡәйнеш! Ни йомош? Ниңә килдең? Хәйер, ниңә килгәнеңде үҙем дә беләм»,— тигән* (Әкиәттән).

**ХӘЙЕРЛЕ** *с.* **1.** Яҡшы, файҙалы, уңышлы. *Хәйерле эш. Хәйерле күреү. Хәйерле юлға сығыу.* ■ *Уйлап ҡара, башҡорт, аҡылың менән, ҡайһы тараф һиңә хәйерле?* Ш. Бабич. *Булат .. урам уртаһында һерәйеп торғансы, ышыҡҡараҡ күсеүҙе хәйерле тапты.* Б. Бикбай. // *[Ҡыҙ менән ялсы:] «Ярай булған эш булған инде, хәйерлегә булһын»,— тигәндәр ҙә алға киткәндәр* (Әкиәттән).

**2.** Сәләмләгәндә йәки яҡшы теләк белдергәндә әйтелә. *Хәйерле кис! Хәйерле юл!* ■ *[Радионан] музыка гөрләп тора. «Хәйерле иртә балалар!» — тигәс уяна ҡыҙым.* Р. Ниғмәти. *[Ҡарттар:] Юлығыҙ аҡ булһын, күңелегеҙ пак булһын. Хәйерле юлға, балалар! Ҡарттарҙан теләк һеҙгә шул булыр!* М. Тажи.

♦ **Алдынан арты хәйерле** кемдеңдер тиҙерәк китеүен теләгәндә әйтелә.

● *Хәйерһеҙ малдан хәйерле зыян артыҡ.* Мәҡәл.

**ХӘЙЕРНИСА** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Инсафлы, яҡшы ҡатын-ҡыҙ. *Һиңә, туташ, теләгем шул: һаман хәйерниса бул һин.* М. Ғафури.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ХӘЙЕР-САҘАҠА** [*гәр.*] *и. йыйн.* Дини йола буйынса алла исеменә доға ҡылдырып биргән төрлө саҙаҡа. *Хәйер-саҙаҡа биреү. Хәйер-саҙаҡа йыйыу.*

**ХӘЙЕРСЕ** *и.* **1.** Хәйер һорап, теләнселәп тамаҡ аҫраған кеше. *Хәйерсегә тулып киткән уңым-һулым. «Ағай, миңә лә бир..» — тип һорап минән.* М. Ғафури. / Әрләгәндә әйтелә. *[Бай — Ғәләүгә:] Хәҙер кейемдәреңде һал, хәйерсе, улар һиңә ҡул түгел!* Т. Йәнәби.

**2.** *күсм.* Үтә ярлы кеше. *Хәйерсегә әйләнеү.*

**3.** *иһш.* Нимәгәлер әсенгәндә, үкенгәндә белдерә. *[Фатима:] Ҡуй инде, хәйерсе, ошо Мәгүзәгә бер һүҙ әйтер хәл юҡ, тотош ауылды тултыра ла ҡуя.* Б. Бикбай.

♦ **Мысыр хәйерсеһе** һораныуҙан бушамаған әрһеҙ кешегә әйтелә. **Хәйерсегә ел ҡаршы** *йәки* **хәйерсенең онон ел осорор** берәй нәмә эшләгәндә көтөлмәгән ҡаршылыҡҡа осрағанда әйтелә. *[Нәжми ағай:] Бер тай алғайны, хәйерсегә ел ҡаршы тигәндәй, ул да үлеп китте, тағы өмөттәр бушҡа сыҡты.* А. Карнай.

● *Хәйерсегә сәләм бирһәң, ямаулыҡ һорар.* Мәҡәл. *Хәйерсе байыҡһа, юлға һыймаҫ.* Әйтем.

**ХӘЙЕРСЕЛЕК** *и.* Бик ярлы хәл; ярлы тормош, фәҡирлек, ярлылыҡ. *Хәйерселеккә төшөү. Хәйерселектә тороу.*

**ХӘЙЕРСЕЛӘНЕҮ** *ҡ.* Бик ярлы хәлгә, бөлгөнлөккә төшөү; фәҡирләнеү; хәйерсегә әйләнеү.

**ХӘЙЕРСЕЛӘҮ** *ҡ.* Хәйер һорау, хәйер һорап тамаҡ туйҙырыу; теләнселәү. *[Үмәр ҡарт:] Әйҙә, бөтә донъямды таратып алһындар, хәйерселәп сығып китәйем, хәҙер бынан да артыҡ хурлыҡ булмаҫ.* Һ. Дәүләтшина. / *һөйл.* Һораныу, теләнселәү. *Аҡса хәйерселәү.* / Кешенән үтескә һ... саҡ һорау.

**ХӘЙЕР-ФАТИХА** *и. дини* Ризалыҡ бир... ҡылған доға, фатиха. *Хәйер-фатиха бире... Хәйер-фатиха алыу.* ■ *[Ҡотлобай:] Беҙҙ... ҡәҙерле муллабыҙ һәм мосолман ағай-эне! Һе... ҙең хәйер-фатихағыҙ арҡаһында иҫән-һау йөрө... .. бына икенсе тапҡыр дин байрамы — ҡорб... ғәйетен үткәрәбеҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**ХӘЙЕРХАҠ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Яҡшылы... изгелек теләгән кеше. *Сереңде әйтмә, зарланм... итмә аҡ, таба алмаҫһың был донъяла хәйерха...* М. Ғафури.

**ХӘЙЕРҺЕҘ** [*гәр.*] *с.* **1.** Эшкә ашмаған, файҙ... һыҙ, насар. *Хәйерһеҙ эш. Хәйерһеҙ юл.*

**2.** Йән көйгәндә, үртәнгәндә әйтелә; йүнһ... *Фәхри — Байназарға:] Ай-һай, ҙур хаталыҡ и... тек, ҙур хаталыҡ! Әлеге бер хәйерһеҙ ҡыҙыулы... шул инде.* Б. Бикбай.

**3.** *иһш.* Ризаһыҙлыҡ тойғоһон, үкенгәнд... әсенгәнде белдерә. *Бик тә йәпле тура килгәй... лә һуң, хәйерһеҙең, .. һөйләшеп булманы ш...* Я. Вәлиев.

● *Ырыҫы булған әҙәмгә хәйерһеҙ йәйҙ... ҡыш артыҡ.* Әйтем.

**ХӘЙЛӘ** [*гәр.*] *и.* **1.** Мутлыҡҡа, алдыҡҡа ҡ... ролған аҫтыртын эш. *Хәйлә ҡороу. Хәйлә бе... мәү.* ■ *«Ялғандың бото ҡыҫҡа" — ти бит халы... Шулай итеп, Өйрәнсектең мәкерле хәйләһе, й... йылдан һуң булһа ла асылған.* З. Биише... *Фекерендә мәкер менән хәйлә тулыҡ, сирҡа... майҙар халыҡты алдап тороп* (Бәйеттән).

**2.** Низер эшләү өсөн уйланған әмәл. *Хәй... өйрәтеү.*

**3.** Ялған сәбәп; һылтау. *Хәйлә эҙләү.* ■ *Ҡы... ҙар мең төрлө хәйлә табып, толпар бикләнг... һарайға инеп, ялынан бер ҡыл .. алып, Алпам... шаға килтереп бирҙеләр, ти.* «Алпамыша». *Б... ҙә хәйлә таба алмаһаң, сыҡ тәҙрә ябырға* (Х... лыҡ йырынан).

♦ **Хәйлә тоҡсайы** хәйләгә оҫта, йылмаяҡ к... ше. *Хәйлә тоҡсайы, йылан аяғын күҫкән нә... бит ул Гәрәй!* Б. Бикбай.

● *Еңгә ҡатында етмеш төрлө хәйлә бу... Әйтем.*

**ХӘЙЛӘИ:** **хәйләи шәрғиә** *ҡар.* **шәрғиә.**

**ХӘЙЛӘКӘР** [*гәр.* + *фарс.*] *с.* Хәйлә мен... эш итеүсән, аҫтыртын, мут холоҡло. *Хәйләк... кеше.* ■ *[Мәғфүрә — Миңлекәй хаҡында:] Ун... юхаланыуына ышанма.., ул, йылан аяғы күҫк... шундай хәйләкәр, ҡылйыуғыс.* Һ. Дәүләтши... / Хәйлә сағылған, мутлыҡ белдергән. *Хәйләк... ҡараш.* // *Хәйләкәр йылмайыу.* ■ *Һөнәрсе... Өйрәнсектең хәйләкәр күҙҙәрендә ниндәй ш... тан бейегәнен күрмәй ҙә абайламай ҙа.* З. Би... шева.

**ХӘЙЛӘКӘРЛЕК** *и.* Хәйләкәр булыу сифат... *Хәйләкәрлек менән алдырыу.*

**ХӘЙЛӘКӘРЛӘНЕҮ** *ҡ.* Хәйләкәргә әйләнә... хәйләкәр булыу. *Хәйләкәрләнә барыу. Арт... хәйләкәрләнеү.*

**ХӘЙЛӘЛЕ** *с.* **1.** Хәйләгә, мутлыҡҡа ҡоролғ... *Хәйләле эш.*

**2.** Хәйлә сағылған, мутлыҡ белдергән. *Хәй... ле ҡараш. Хәйләле күҙ.* // *Хәйләле йылмайы...*

■ *Ишек алдына Ҡунаҡбаев сыҡты. Уның .. һоро күҙҙәре хәйләле ҡарай ине.* Ә. Вәли.

● *Хәйләле эштә хәйер юҡ.* Мәҡәл.

**ХӘЙЛӘЛӘҮ** *ҡ.* Хәйлә ҡороу, хәйлә менән эш итеү. *Оҫта хәйләләү. Хәйләләй белмәү.* ■ *Мулла хәйләләп, ҡыҙҙарҙы үҙенә алып ҡалырға самалай икән, ти* (Әкиәттән).

**ХӘЙЛӘЛӘШЕҮ** *ҡ.* **1.** Хәйлә ҡороу, хәйлә табыу. *Хәйләләшеп эште боҙоу.*

**2.** *ҡар.* **хәйләләү.** *Бай ризалаша. Йәрәбә һалалар. Батша хәйләләшеп байҙы ҡаҙанға алдан сумыра* (Әкиәттән).

**ХӘЙЛӘҺЕҘ** *с.* **1.** Алдыҡ, хәйлә белмәгән, эскерһеҙ. *Хәйләһеҙ кеше. Хәйләһеҙ күңел. Хәйләһеҙ булыу.*

**2.** Хәйлә ҡатышмаған, ихлас, ысын күңелдән башҡарылған. *Хәйләһеҙ эш. // Хәйләһеҙ эшләү.*

**ХӘЙРИӘ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Матди ярҙам күрһәткән.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ХӘЙРӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һәр төрлө яҡшы, изге эш; изгелек, яҡшылыҡ. *Ҡайҙа шаулай йәш йөрәктәр ал, ҡыҙыл байраҡ менән — унда аслыҡ һәм дә юҡлыҡ ҡалтырай хәйрәт менән.* Б. Ишемғол.

**ХӘКИМ** *и. ҡар.* **хаким.**

**ХӘҠИҠӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ысынбарлыҡта булған, ысынбарлыҡҡа тап килгән эш-хәл; дөрөҫлөк. *[Новиков:] Ябай ғына хәҡиҡәтте төшөнөргә ваҡыт бит инде: кем өсөн түгәбеҙ беҙ был ҡан даръяларын?* Д. Юлтый. *Хәҡиҡәт шул: һәр көн алыҫая Зәйнәп менән Сәйҙел араһы.* Ғ. Сәләм.

**2.** Дөрөҫлөгө тормош тәжрибәһендә һыналған, нығынған фекер һәм ҡараш. *Бәхәсһеҙ хәҡиҡәт. Хәҡиҡәтте аңлау.* ■ *Хәҡиҡәтте тура юлдарынан яҙлыҡтырыр көстәр бармы ни?* А. Игебаев.

● *Хәҡиҡәтте белмәү гәйеп түгел, белә тороп күрмәү — гәйеп.* Әйтем.

**ХӘҠИР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Ҡәҙерһеҙ, меҫкен. *Хәҡир мин ил ҡуҙендә, сөнки туҙған кейем өҫтөмдә.* Б. Мирзанов.

**ХӘҠӘРӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кешенең намыҫына, ғәрлегенә тейә торған әсе мыҫҡыл *Ашкан бер ғалим сыкһа, яманлайбыҙ, мәжлесте гәйбәт менән тамамлайбыҙ. Эшебеҙ йә истинһҙа, йә хәҡәрәт, үҙебеҙҙе һәр гәйептән аманлайбыҙ.* Аҡмулла. *[Ҡарамырҙа:] Кургәнем юҡ бындай хәҡәрәтте, алтмыш бишкә йәшем килгәнсә. Был хурлыҡты ҡылған бындай эште язалайым йәнен биргәнсә!* Х. Ғәбитов.

□ **Хәҡәрәт итеү** мыҫҡыллау, хурлау. *[Әмирханов:] һөйләргә мөмкин, ләкин кешенең инсаниатын хәҡәрәт итергә .. бераүгә лә ирек бирелмәҫ!* С. Агиш.

**ХӘҠӘРӘТЛӘҮ** *ҡ.* Кешенең ғәрлегенә тейеү; мәсхәрәләү, хурлау; мыҫҡыл итеү. *[Төлкө:] «Былай, ҡойроҡһоҙ көйө .. һинән бөтә йәнлек көлөр, мыҫҡыл итер, хәҡәрәтләр»,— тип, айыуҙың йөрәгенә тағы ла ут һалған* (Әкиәттән).

**ХӘЛ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Физик көстән килгән мөмкинлек; көс. *Хәл бөтөү. Хәл ҡалмау.* ■ *Заятүләк тәүҙә ҡаршы тороп, хәл еткән саҡлы һуғышырға ла һуңынан Һыуһылыу менән .. ҡасып китергә уйлай.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». **Хәл инеү** ял итеп көс алыу, хәлләнеү. **Хәлдән тайыу** бик ныҡ арыу, хәлһеҙләнеү. *Хәлдән тайып йығылыу.* / Нимәнелер эшләү, булдырыу мөмкинлеге; әмәл. *Белер хәл юҡ. Сыҙар хәл ҡалманы.* ■ *Ҡайһы рота, ҡайһы батальон икәнен аңлар, .. иптәштәрҙе табыр хәл юҡ.* Д. Юлтый.

**2.** Матди көстән килгән мөмкинлек; байлыҡ кимәле. *[Гәрәйҙең] быйыл игене уңманы, хәле юҡ.* Б. Бикбай. *«Ҡалын түләрлек кенә хәлем бар минең»,— тигән Көмөшбайҙың әсәһе батшаға* (Әкиәттән).

**3.** Кешенең физик һәм рухи кисереше, үҙен хис итеү рәүеше. *Ауыр хәлдә булыу. Хәл белешеү.* ■ *Белмәйһең дә ағай, хәлемде, йөрәкәйем өҙөлә еп кеүек* (Сеңләүҙән). / Тормош шарты, йәшәү рәүеше. *Ни хәлдә йәшәйһең?* ■ *Әй Ватан, беҙ аңланыҡ хәлеңде; һине һалып кулбашка, беҙ йөкмәнек гәмеңде.* Ш. Бабич. *Хәсрәт хәле бик ауыр хәл, май кундырмай йөрәк башына* (Халыҡ йырынан). / Йәмғиәт тормошона бәйле булмыш. *Ижтимаги хәл. Социаль хәл.* ■ *Аккужа үҙенең артыҡ-бортоҡтарын ҡымтыштырып ҡуйып, ҡәҙимге крәҫтиән хәленә инеп алды.* Ғ. Дәүләтшин. / Ниндәйҙер бер шарттағы, сифаттағы рәүеш, булмыш. *Уңайһыҙ хәлдә булыу. Көлкөлө хәлдә ҡалыу. Тоткон хәлендә булыу. Элекке хәлгә ҡайтыу.* ■ *Тәҙрәләр ябыҡ, ҡапҡалар бикле, ауыл тамам ташландыҡ бер хараба хәлендә ине.* М. Ғафури.

**4.** Тормошта булған төрлө күренеш, ваҡиға. *Ғәжәп хәл. Күңелһеҙ хәл. Ҡыуаныслы хәл.* ■ *Бар әйберҙәр ҡыҙғандыр, донъя тулған туҙандыр, был хәлдәрҙе ҡыҙған бер, һип һыуыңды, һип, ямғыр!* Ш. Бабич.

**5.** Йәмғиәт тормошона, ижтимағи мөнәсәбәттәргә бәйле эш, ваҡиға. *Халыҡ-ара хәл. Һуғыш хәлдәре.*

**6.** *грам.* Һөйләмдә эштең башҡарылыу ваҡытын, урынын, сәбәбен, маҡсатын, шартын белдергән эйәрсен киҫәк. *Ваҡыт хәле. Кире хәл. Маҡсат хәле. Сәбәп хәле. Урын хәле. Шарт хәле.*

□ **Хәл итеү** (*йәки* **ҡылыу**) тикшереп асыҡлау, бер ҡарарға килеү. *[Новиков] хатта һалдаттар араһында булған талашты ла хәл итә, гәйеплеләргә хөкөм яһай башланы.* Д. Юлтый.

♦ **... [ғына] бер хәл** был ғына түгел, бынан да күңелһеҙерәге бар тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Крәҫтиәндәр араһында] тынып ҡалыу ғына бер хәл әле, иптәш Дауытов, ә ҡайһы бер ауылдарҙа колхоздан сығыу фактары бар [ти Ғәләү].* Б. Бикбай. **... [тағы] бер хәл** эш-хәл менән риза булмағанды белдерә. *Сәхи .. кәзә-һарыҡ күтәргә тотонған. Йүнләп көтһә тағы бер хәл.* М. Тажи. **Ни хәл итәһең** (*йәки* **итмәк кәрәк**) нимәгәлер сараһыҙҙан күнгәнде белдерә. *Ни хәл итәһең, кушкас эшләйһең инде.* ■ *[Йылан батшаһы Тимербулатҡа:] үҙенең кесе ҡыҙын бирһә генә уттан ҡотҡарам,— тигән. Ни хәл итәһең бит, риза булырға тура килгән* (Әкиәттән). **Хәл алыу** 1) ял итеп көс йыйыу. *Ултырып хәл алыу;* 2) төрлө кисереш ауырлыҡтан арынып, иркенләү. **Хәл булыу** *һөйл.* юҡҡа сығыу, юҡ булыу. *[Янғын һүндергән кешеләр:] Ут-күҙҙән һаҡлаһын хоҙай.. Ни хәтле дәүләте күҙ асып күҙ йомғансы хәл булды ла ҡуйҙы.* Ж. Кейекбаев. **Хәлгә кереү**

ауыр хәлдәге кешегә ярҙам ҡулы һуҙыу, яҡшылыҡ эшләү. *Хафиз ҡарт үҙенсә Зыяның хәленә керергә теләп, төрлөсә кәңәш тә биреп ҡараны.* М. Тажи. **Хәлдән килеү** ниҙер эшләргә булдырыу; ҡулдан килеү. *Хәлдән килгән ҡәҙәре тырышыу.* **Хәл иткес** ҙур әһәмиәте булған, бик мөһим. *Уҡыусының донъяға ҡарашын һәм уның әхлаҡ принциптарын формалаштырыуҙа мәктәп хәл иткес роль уйнай.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1965, № 7. **Хәл ҡылым** эштең эшләнеү рәүешен, сәбәбен, йәки үтәлеү ваҡытын белдергән ҡылым төркөмсәһе. **Хәл ҡәҙәр** (**йәки ҡәҙәренсә**) көс еткәнсә, мөмкин булғанса. *Яу ҡырында яраланып, хәл ҡәҙәр дауаланып, ҡайтып килә ине һалдат.* С. Кулибай. **Хәл эсендә** (**йәки өҫтөндә**) ятыу бик ҡаты ауырыу, үлем сигендә булыу. *Өйгә ҡайтҡас, ни күҙем менән күрәйем, гәзиз әсәйем түшәк өҫтөндә, хәл эсендә ята.* М. Ғафури. **Хәл эйтеме** төп ойоштороусы компоненты ҡылым булып, ике йәки бер нисә тулы мәғәнәле һүҙҙән торған синтаксик берәмек. **Хәл юҡ** 1) нимәнелер сараһыҙҙан эшләгәндә белдерә. *Хәл юҡ, атты һуйырға булалар. Ит булаһын һиҙгәс, мулла ла ҡайтып китмәй, теге ҡатынды өшкөргән булып, шунда ҡала* (Әкиәттән); 2) ниндәйҙер эш-хәл шартында кемдеңдер мотлаҡ бер нәмә эшләүҙән белдереү өсөн әйтелә; әмәл юҡ. *Урамдан егет-улаҡ уҙыр хәл юҡ, күҙең-ҡашың аҡшаңлап, ауыҙың күтәреп һүҙ ҡуша башлайһың.* Т. Хәйбуллин. **Һәр хәлдә** *инш.* нисек кенә булмаһын. *Сабыуға, йүгереүгә ҡалһа, уларҙан уҙмаһам, һәр хәлдә, ҡалышмам.* С. Агиш.

● *Астың хәлен туҡ белмәҫ.* Әйтем.

**ХӘЛБУКИ** *терк. иҫк. кит.* Әммә, ләкин, ысында, ғәмәлдә. *[Еңгәм:] «Ошонан ҡасан ҡотолорбоҙ, бер нәмә урынында тормай. Һөт өҫтө тиһеңме, ҡатыҡ тиһеңме — береһен дә ҡалдырмай,» — ти. Хәлбуки, мин уларҙан йәшереп бер ниҫәк арыш икмәген дә алғаным юҡ.* М. Ғафури.

**ХӘЛ-ВАҠИҒА** *и. йыйн.* Тормошта була торған һәр төрлө хәл һәм ваҡиға. *Ижтимағи тормошҡа бәйле хәл-ваҡиға. Тарихи хәл-ваҡиға.*

**ХӘЛДӘ** *бәйл.* Сифат ҡылымдын «ған» формаһынан һәм күрһәтеү алмаштарынан һуң килеп, кем йәки нимәнеңдер ни рәүештә булыуын белдерә. *Ултырған хәлдә. Был хәлдә. Ошо хәлдә.* ■ *Ошондай аптыраған хәлдә [Фәхриҙең] өйәнәге тотҡан кешегә һалыша торған ғәҙәте бар.* Б. Бикбай. / Шул уҡ грамматик формала һәм **ла** көсәйтеү киҫәксәһе менән, төп фекергә кире мәғәнәләге эш-хәлде белдергәндә ҡулланыла. *Барған хәлдә лә. Ултырған хәлдә лә.*

**ХӘЛЕҒ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Бергә йәшәү мөмкинлегенән яҙҙырыу айырылыштырыу хәле. *Миңә наҙан кешегә, талаҡ вә хәлеғ нисек икәнен мулла баян итмәне.* М. Өмөтбаев.

**ХӘЛИСАНА** [*фарс.*] *р.* Ысын күңелдән. *Имеҙәләр әнкәң һөйөп-ҡағып үҙенең аҡ һөтөн, барса ҡайғынан һәм үйҙарҙан хәлисана бисүбәтүн.* Ш. Тульвинский.

**ХӘЛИФӘ** [*ғәр.*] *и. тар.* Ҡайһы бер Яҡын һәм Урта Көнсығыш мосолман илдәрендә дини һәм политик власҡа эйә булған юғары феодаль хаким титулы һәм шул титулдағы кеше.

**ХӘЛИФӘЛЕК** *и. тар.* **1.** Феодаль мосолман илдәрендә дин башлыҡтары идара итеүенә нигеҙләнгән дәүләт короллоцо системаһы.

**2.** Ғәрәп яулап алыусылары тарафынан төҙөлгән һәм башында хәлифә торған феодаль дәүләт. *Бағдат хәлифәлеге. Ғәрәп хәлифәлеге.*

**ХӘЛҠӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Дүңгәләк, түңәрәк. *Бөтөн халыҡ .. докторҙарҙы ҙур хәлҡә булып солғаны.* А. Таһиров.

**ХӘЛЛЕ** *с.* **1.** Физик көсө, хәле булған; шәпле. *Йәш саҡ — хәлле саҡ.*

**2.** Мул, етеш тормошло. *Хәлле колхоз // Хәлле йәшәү.* ■ *[Низам — Әхтәмгә:] Хәлле кешеләр бит улар, ашарға мул, кәйем яҡшы, ҡайғы юҡ.* М. Тажи. *Хәлле тормошло кешеләр .. ғәҙәттә игенде яллап урҙыралар, ә Сәхәп мулла бөтәһен дә үҙ көсө менән башҡара.* Д. Исламов.

◆ **Урта хәлле крәҫтиән мал-мөлкәте**, ҙур булмаған ере булып, шуны үҙ ҡул көсө менән эшкәрткән яңғыҙаҡ. *[Шакир:] Әллә тағы урта хәлләрҙе кәрәкме кулак тип атарға?* С. Ҡудаш.

**ХӘЛЛӘНДЕРЕҮ** *к.* **1.** Көслө, хәлле итеү. *Ашатып хәлләндереү.*

**2.** Етеш, мул тормошло итеү. *Колхозды хәлләндереү.*

**ХӘЛЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Көс-хәл инеү, арыуланыу. *[Медсестра — Әсәгә:] Температураһы төшөп хәлләнә башлағас та районға алып барыу сараһын күрергә кәрәк. Больницаға һалып дауалағанда яҡшыраҡ булыр ине.* М. Тажи. *Һунарсы икмәкте ашап, хәлләнеп ала ла, ҡайтып китә* (Әкиәттән).

**2.** Етешлегә әйләнеү, материаль яҡтан арыуланыу. *[Мохтар:] Заманында Сибайға килдем дә ер өй һалып индем... Хәлләнә төшкәс, ул өйҙө төртөп ауҙарҙым да шыңғырлап торған оло өй һалдым.* Ш. Насыров.

**ХӘЛЛӘҮ: хәл хәлләү** кемделер ҡайғыртып хәленә кереү. *[Зифа:] Уларҙың хәлен хәлләп, эшкә ҡул һелтәһәк, .. киләсәктә беҙгә оят булыр.* Н. Мусин.

**ХӘЛҮӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Онталған көнбағыш йәки сәтләүек еменә шәкәр ҡушып яһалған татлы аҙыҡ. *Көнбағыш хәлүәһе. Сәтләүек хәлүәһе.* ■ *Аҡ ҡалаҫҡа ғына ҡәнәғәт итмәй, хәлүә кеүек нәмәләр ҙә ала торған булып киттек.* М. Ғафури.

**2.** *диал.* Әүмәлә. *Хәлүә бешереү.*

**ХӘЛФӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Мәҙрәсәлә уҡытҡан кеше. *«Бигерәк уңған балаһың,» — тип, хәлфәне маҡтап туя алмай.* Х. Ғәбитов.

**ХӘЛФӘЛЕК** *и.* Хәлфә вазифаһы.

□ **Хәлфәлек итеү** хәлфә булыу. *Нурғали ахун утыҙ йыл хәлфәлек иткән кеше.* Ш. Бабич.

**ХӘЛҺЕҘ** *с.* **1.** Көс-хәле самалы; көсһөҙ. *Хәлһеҙ кеше. Хәлһеҙ булыу.* ■ *[Вася:] «О, һинме ни Булатик?» — тип ҡуйҙы ла, хәлһеҙ ҡулын күрешергә һуҙҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Тормошо етешһеҙ; ярлы. *Хәлһеҙ крәҫтиән хужалығы.*

**ХӘЛҺЕҘЛЕК** *и.* **1.** Физик көсө булмаған хәл; көсһөҙлөк. *Хәлһеҙлектән йонсоу.*

**2.** Етешһеҙ, ярлы тормош; ярлылыҡ. *Хәлһеҙлектән арыныу.*

**ХӘЛҺЕҘЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Көс-хәлдән яҙҙырыу, көс-хәлһеҙ итеү. *Ашатмай хәлһеҙләндереү*

**ХӘЛҺЕҘЛӘНЕҮ** *к.* Көс-хәлдән яҙыу; хәлһеҙ булыу. *Бара торғас, алты пар сыбар ат арып-талып хәлһеҙләнеп туҡтап ҡала* (Әкиәттән).

**ХӘЛӘЛ** [1] [*ғәр.*] *с.* **1.** *дини* Шәриғәт тарафынан тыйылмаған ашау-эсеүгә, файҙаланыуға рөхсәт ителгән; *киреһе* хәрәм. *Хәләл ризыҡ.* ■ *[Мулла:] «Купецтарға ундай кейем хәләл, ә һеҙгә [ауыл мосолмандарына] хәрәм,» — тигән.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Көс түгеп, хеҙмәт менән табылған. *Хәләл аҡса. Хәләл мал. [Карт большевик:] Әшсе икмәкте тел сарлап түгел, ә тир түгеп таба. Шуға уның икмәге хәләл була.* З. Биишева.

**3.** *күсм.* Йөрәккә яҡын, ҡәҙерле, изге. ■ *Бир һин миңә хәләл көсөн менән эшләп иргә баҫҡан ҡулыңды.* М. Ғафури. *Илкәй өсөн сыҡһын ғәзиз йәндәр, хәләл ергә аҡһын хәләл ҡандар.* Ш. Бабич.

**4.** Никахҡа ингән; никахлы. *Хәләл ҡатын. Хәләл ир.* ■ *[Сәлимә — Хәкимгә:] Һиңә ҡарай буламмы? Хәләл абышҡаны һиңә алыштыра буламмы?* Я. Хамматов. // *Ваҡыт етеп ҡайтып килһәм ҡаршы сығыр хәләлем* (Бәйеттән).

● *Иҫәктән көсө хәләл, ите хәрәм.* Әйтем.

**ХӘЛӘЛ** [2] [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Зарар, зыян. *Кешелеккә, бәндәлеккә ярлылыҡ бирмәҫ хәләл. Ул ҡара икмәк уға эсә һөтө кеүек хәләл.* М. Ғафури.

**ХӘЛӘЛЛӘҮ** *к.* Хәләл тип табыу, дөрөҫкә сығарыу. *[Хәҙрәт .. Йәлилдең тәмәке тартыуын:] «Тәмәке уны .. дин ҡәрҙәштәребеҙ булған төрөк илдәрендәге ғибәҙәт йорттары эсендә лә тартып алалар. Унан бер зарар ҙа юҡ..»,— тип хәләлләп булаша ине.* И. Насыри.

**ХӘЛӘТ** [*рус.* халат ⟨ *ғәр.*] *и. ҡар.* **халат.**

**ХӘЛӘФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Кемделер алмаштырған кеше; урынбаҫар.

**2.** Киләсәк быуын. *Ителер өмөт хәләфтән.* М. Өмөтбаев.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ХӘЛ-ӘХҮӘЛ** [*ғәр.*] *и. йыйн.* **1.** Тормош, көнкүреш хәлдәре. *Хәл-әхүәл менән танышыу.* ■ *Соня табып әҙерләй, Сергей менән әсәһе бөтә хәл-әхүәл тураһында һөйләшәләр.* Ф. Рәхимғолова. *Аш ваҡытында Ҡамыр батыр ҡала хаҡында, ындағы хәл-әхүәл тураһында һораша башланы* (Әкиәттән).

**2.** Кешенең хәле; иҫәнлек-һаулыҡ. *Хәл-әхүәл һорашыу.* ■ *Әршит менән Сәйҙел бергә китте. Хәл-әхүәлдән һүҙгә күстеләр.* Ғ. Сәләм. *Аннаклыч һалдаттарҙың хәл-әхүәлен һорашып йөрөп сыҡҡандан һуң, үҙенең блиндажына .. ҡайтты.* Ә. Ихсан.

**ХӘМЕД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Маҡтау, маҡтау һүҙе. *Бу ғәләмгә сәнә хәмед булһын.* М. Өмөтбаев.

**ХӘМЕЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Йөк.

**2.** *күсм.* Ҡорһаҡтағы бала. *[Ҡатын] төрөкмәнгә килде, төрөкмән ҡатыны булды, хәмәленән Сәйҙәш атлы ул тыуҙы.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

□ **Хәмел итеү** (*йәки* **ҡылыу**) япһарыу, юрау. *[Януарҙың] эшен һис кем яман тимәй, бәлки берәр яҡшылыҡҡа хәмел ҡылды.* М. Ғафури.

**ХӘМЕР** [*ғәр.*] *и.* Иҫерткес эсемлек; шарап. *Хәмер эсеү.* ■ *Хәмер ҡоло хәйер һорар баҙарҙа.* Й. Солтанов.

**ХӘМЕРХАНА** [*ғәр.* + *фарс.*] *и.* Иҫерткес эсемлек эсә торған бина.

**ХӘМИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Кемдеңдер яҡлауы, ҡурсалауы, ярҙамы.

□ **Хәмиәт итеү** (*йәки* **ҡылыу**) ярҙам итеү, ҡурсалау. *Унда [хәсистә] инде яҡшы ниәт һәм кешелек ҡалмаған, изге ниәт, ғали ҡиммәт тә хәмиәт ҡылмаған.* М. Ғафури.

**ХӘМИӘТЛЕ** *с. иҫк. кит.* Ярҙамсыл. *Шағир Бәкирҙе, Ғибаҙиҙы ҡалалағы «хәмиәтле» байҙар, «мәғрифәтле» мөғәллимәләр тиҙерәк Ырымбурҙан оҙатырға ашыҡтырғандар.* А. Таһиров.

**ХӘМИӘҺЕҘ** *с. иҫк. кит.* Ярҙамһыҙ. *Ул тырышты хәмиәһеҙ ҡыҙ-ҡатындар хаҡына.* Н. Ҡәрипов.

**ХӘМЛӘ** [*ғәр.*]: **хәмлә итеү** *иҫк. кит.* һөжүм итеү. *Былар хәмлә иткән һәр бер әйбер юҡҡа сыға.* М. Ғафури.

**ХӘМСЕҮ** *к. диал.* Урлау, сәлдереү.

**ХӘМӘЛ** [*ғәр.*] *и.* **1.** (*баш хәреф менән*) *астр.* Ун ике бөрөждөң бере; Хут һәм Сәүер бөрөждәре уртаһында урынлашҡан.

**2.** Ҡояш календары буйынса беренсе айҙың ғәрәпсә исеме (22 март — 21 апрель). *Хәмәл һыуығы.* **Хәмәл бураны** март уртаһында була торған көслө буран; аҡман-тоҡман.

● *Хәмәл әмәлендә ҡоротор.* Әйтем.

**ХӘНИФ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Бер аллаға ышанған кеше.

**2.** Саф күңелле кеше.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ХӘНИӘР** [*фарс.*] *и.* Ике яғы ла үткер осло бысаҡ. *Көмөш һаплы хәнйәр. Хәнйәр тағыу.* ■ *Ул [Юлдыбай] хәнйәрен тотоп, атылған уҡ кеүек, айыу өҫтөнә ташланған* (Әкиәттән).

**ХӘНӘҮӘТ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Ҡыҙғылт һары. *Ана килә бер кеше, хәнәүәт уның тун тышы* (Халыҡ йырынан).

**ХӘРБИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Һуғышҡа бәйләнеше булған. *Хәрби хәл.* ■ *[Капитан:] Полктың торған ерен һуғыш хәлдәрен хатта бөтөнләй яҙырға ярамай. Ул хәрби сер.* Д. Юлтый./ Һуғыш кәрәк-ярағы өсөн тәғәйенләнгән. *Хәрби завод. Хәрби ҡарап. Хәрби техника.*

**2.** Армия менән бәйле булған; ғәскәри хеҙмәткә мөнәсәбәтле булған. *Хәрби училище. Хәрби хеҙмәт. Хәрби уйын.*

**3.** Ғәскәри хеҙмәт кешеһенә мөнәсәбәтле; ғәскәри. *Хәрби бурыс. Хәрби ант.*/ Ғәскәри хеҙмәт кешеһенә хас. *Хәрби ыҫпайлыҡ. Хәрби батырлыҡ.*/ Ғәскәри кешеләр өсөн тәғәйенләнгән. *Хәрби госпиталь. Хәрби ҡаласыҡ.*

**4.** Армияла хеҙмәттә булған, армияла хеҙмәтен үтәгән. *Хәрби врач. Хәрби корреспондент.*

**5.** *и. мәғ.* Хәрби кеше, армияла хеҙмәт итеүсе. *Хәрбиҙәр торлағы. Хәрбиҙәр кейеме.*

◆ **Хәрби коммунизм** Совет власының граждандар һуғышы һәм интервенция осорондағы экономик политикаһы (1918—1920 йылдарҙы эсенә ала).

**ХӘРБИЛӘШЕҮ** *к.* Һуғыш шарттарына яйлашыу, хәрби ихтыяждарҙы хеҙмәтләндереүгә күсеү.

**ХӘРБИЛӘШТЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **хәрбиләштереү.** *Хәрбиләштерелгән завод.*

**ХӘРБИЛӘШТЕРЕҮ** *к.* **1.** Һуғыш шарттарына яйлаштырыу, хәрби ихтыяждарҙы хеҙмәтләндереүгә күсереү./ Граждан халҡын һуғыш эшенә өйрәтеү.

**2.** Ғәскәри төҫ биреү, хәрбиҙәрсә итеү. *Спорт уйындарын хәрбиләштереү.*

**ХӘРБИ-ПАТРИОТИК** *с.* Ғәскәри хеҙмәткә һәм политик аңға бәйле. *Хәрби-патриотик тәрбиә.*

**ХӘРБИ-ПОЛИТИК** *с.* Ғәскәри хеҙмәткә һәм политик аңға бәйле. *Хәрби-политик белем.* ■ *[Полковник Шайморатов] полктарҙа һәм эскадрондарҙа личный составтың хәрби-политик белемдән имтихан биреү менән ҡыҙыҡһынды.* Ә. Ихсан.

**ХӘРБИ-ЭКОНОМИК** *с.* Хәрби көскә һәм экономикаға бәйле. *Илдең хәрби-экономик потенциалы.*

**ХӘРЕЗ** [*ғәр.*] *и. кит.* **1.** Тотолған, сарыф ителгән нәмә; сығым. *Туй хәрезе.* ■ *Кусәкбайҙың «штабына» яу хәрезе сифатында йыйылған хазинанан да .. байтаҡ ҡына биргәйнеләр.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Матди мөмкинлек; аҡса. *Юл хәрезе. Хәрез табыу.* ■ *[Аманов — Нурйәндән:] «Баш-күҙ алғанса көн күреп торорлоҡ бер аҙ хәрезең бармы һуң?» — тип һораны.* С. Кулибай.

**3.** *диал.* Юл аҙығы.

**ХӘРЕЗЛӘҮ** *к. диал.* Юллыҡ аҙыҡ һалыу.

**ХӘРЕФ** [*ғәр.*] *и.* Телдәге өндөң яҙма билдәһе. *Баш хәреф. Баҫма хәреф. Ғәрәп хәрефе.* **Хәреф таныу** (*йәки* **айырыу**) уҡый-яҙа белеү. *Хәреф танып, күҙе асылғас та бөтә ергә уны еккәндәр; бара-тора инде, бер съезда районный уҡ «түрә» иткәндәр.* Ғ. Амантай. *Атай үҙ тырышлығы менән .. бер аҙ хәреф айырырға өйрәнгән.* Ә. Вәли. **Хәрефкә хәреф** һүҙмә һүҙ.

**ХӘРЕФЛӘҮ** *к.* Һәр хәрефте айырып әйтеү (уҡығанда). *Хәрефләп уҡыу.*

**ХӘРИФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Яҡын кеше, иптәш.

**2.** Әхләҡи насар, боҙоҡ эшәке кеше. *Уянығыҙ, башҡорттар, Ҡуҙғалығыҙ! Тогро юлға мәгарифкә күҙ һалығыҙ! Залимдарҙан, хәрифтәрҙән тапатмаҫҡа, хаҡлыҡ тыуын күтәрегеҙ, кулға алығыҙ!* Д. Юлтый.

**ХӘРӘБӘ** *и. кар.* **хараба.**

**ХӘРӘКӘ** [*ғәр.*] *и. кит.* Ғәрәп яҙыуында һуҙынҡылар урынына йөрөп, хәрефтең өҫтөнә йәки аҫтына ҡуйыла торған махсус билдә.

**ХӘРӘКӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Нәмәнең йәки уның өлөштәренең үҙ торошон үҙгәртеүе; тыныс йәки тик торошҡа ҡапма-ҡаршы хәл. *Периодик хәрәкәт. Ритмик хәрәкәт. Сайкалған хәрәкәт. Әйләнгән хәрәкәт. Планета хәрәкәте. Хәрәкәт яһау. Хәрәкәтһеҙ калыу. Хәрәкәттә булыу.* ■ *Офоҡҡа хәрәкәтһеҙ болоттарҙан юлаҡ-юлаҡ булып ҡара таҫма таралды.* З. Биишева./ Төрлө механизмдың эше, эшмәкәрлеге. *Моторҙы хәрәкәткә килтереү.*

**2.** *филос.* Материаль донъяның өҙлөкһөҙ үҙгәреүенән һәм үҫеүенән торған йәшәү ысулы.

**3.** Ниндәйҙер бер йүнәлешкә табан күмәк ҡуҙғалыш; бер урындан икенсе урынға күсеш. *Фронт буйында күмәк ғәскәр хәрәкәте ярамай, .. ундай походтар кис менән була.* Д. Юлтый. / Транспорт йөрөшө. *Поездар хәрәкәте. Трамвай хәрәкәте.*/ Кеше, машина һәм башҡа нәмәләрҙең төрлө йүнәлештәге йөрөшө; тын, һил булмаған хәл. *Урамда хәрәкәт юҡ. Хәрәкәт баҫылды.* ■ *Күп тә үтмәй кешеләр ҙә күбәйҙе, хәрәкәт көсәйҙе.* Т. Йәнәби. *Ике көн ҡала туп, пулемёт мылтыҡ тауыштарынан шаулап тора. Ҡаланың хәрәкәт бөтә.* З. Шәрҡи.

**4.** Тәндең йәки тән ағзаларының торошондағы үҙгәреш, ҡуҙғалыш. *Ҡул хәрәкәте. Тән хәрәкәте. Хәрәкәт яһау. Хәрәкәтһеҙ ҡатып ҡалыу.* ■ *Ултырған ерҙән аяҡтарҙы бейетәм, ҡулдарҙы хәрәкәткә килтерергә маташам.* Д. Юлтый. *Бала йүгерә. ..Улы хәрәкәте артынан ҡарап ҡына тора әсәһе.* Ғ. Сәләм.

**5.** *күсм.* Билдәле бер маҡсаты булған ижтимағи эшмәкәрлек. *Революцион хәрәкәт. Азатлыҡ хәрәкәте. Партизандар хәрәкәте. Тыныслыҡ яҡлылар хәрәкәте.*

□ **Хәрәкәт итеү** 1) ниндәйҙер бер йүнәлештә барыу, ҡуҙғалыу. *Алға табан хәрәкәт итеү* 2) тик тормай, хәрәкәттә булыу; хәрәкәтләнеү *[Хәлимов] ҡуҙғалмай ултыра, тик уның башы менән ҡулдары ғына хәрәкәт итә.* Д. Юлтый 3) эшләү, йөрөү (машина, механизмдарға ҡарата). **Хәрәкәткә килеү** 1) тик торған тыныс хәлдән сығыу; хәрәкәтләнеү; 2) эшләй башлау.

● *Хәрәкәттә — бәрәкәт.* Әйтем.

**ХӘРӘКӘТЛЕ** *с.* Хәрәкәтләнә торған. *Ете хәрәкәтле кеше. Ауыр хәрәкәтле булыу.*

♦ **Хәрәкәтле уйындар** йүгереү, һикереү һ. б. кеүек хәрәкәттәр менән башҡарылған уйындар.

**ХӘРӘКӘТЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Хәрәкәткә килтереү. *Ҡулды хәрәкәтләндереү. Тәнде хәрәкәтләндереү.*

**ХӘРӘКӘТЛӘНЕҮ** *к.* Хәрәкәттә булыу; ҡыймылдау, йөрөү. *Хәрәкәтләнеп тороу.* ■ *[Уйнаған сақта] башҡалар һөйләшәләр, хәрәкәтләнәләр, ә ул [Халилов] .. төндәр буйы ҡуҙғалмай ултыра.* Д. Юлтый.

**ХӘРӘКӘТСЕЛ** *с. кар.* **хәрәкәтсән.**

**ХӘРӘКӘТСӘН** *с.* Тик тормаған, хәрәкәтләнеп тороусан. *Хәрәкәтсән бала. Хәрәкәтсән булыу.*

**ХӘРӘКӘТТӘГЕ:** **хәрәкәттәге армия** армияның һуғыш ваҡытында фронтта булған частары *Совет Армияһының хәрәкәттәге частары гитлерсыларҙы төрлө яҡлап ҡыҫа башланы.* Ә. Ихсан.

**ХӘРӘМ** [*ғәр.*] *с.* **1.** *дини* Дин, шәриғәт тарафынан тыйылған; ашау-эсеүгә, файҙаланыуға рөхсәт ителмәгән; *киреһе* **хәләл.** *Хәрәм нәмә. Хәрәм аш.*

**2.** Көс түгеп табылмаған, тейешһеҙ юл менән алынған. *Хәрәм аҡса.* ■ *Шикле малың өсөн шелтә, хәрәме өсөн — ғазап.* М. Ғафури. **Хәрәм ашау** тейешһеҙ еңел юл менән табылған нәмәне файҙаланыу. *[Сәлимгәрәй:] Мин һеҙҙең шикеле, хәрәм ашап, бурлыҡ менән байымаға..* Ж. Кейекбаев. **Хәрәм тәртеү** хәрәмдән мал йыйған кеше зыян күргәндә әйтелә.

**3.** *күсм.* Намыҫка ҡаршы килгән, ярамай тип табылған, килешһеҙ, насар. *Хәрәм эш. Хәрәм юлға төшөү. // Хәрәм менән йәшәү. Хәрәмдән килгән мал.*

**4.** (*йәки* **хәрәм һарайы**) Мосолмандарҙың ҡатын-ҡыҙы тора торған йорт йәки бүлмә. *[Зинкевич:] Бындай байлыҡ менән мин бөгөн төрөк солтаны. Хәрәм һарайын ғына табаһы ҡалды.* Ә. Мирзаһитов.

♦ **Хәрәм йөнө** ҡаҙҙың ҡанат аҫтындағы йолҡоп ташлана торған йөнө. **Хәрәм талаҡ яһау** *диал.* ҡатынды айырыу. *Батша ҡалған ҡатындарына: [Йәш ҡатынды] ситләтмәгеҙ, әгәр ситләтһәгеҙ, хәрәм талаҡ яһармын,— тигән* (Әкиәттән). **Хәрәм һөйәк** эрләгәндә әйтелә. *Мин артыҡ түҙеп тора алманым.., ҡысҡырып ебәрҙем «Күҙемдән юғал, хәрәм һөйәк!.. Нисек ер күтәрә әле үҙен.* М. Садыкова.

● *Мал әйәһенә окшамаһа, хәрәм була.* Әйтем.

**ХӘРӘМЛӘШЕҮ** *ҡ.* Үҙ файҙаһына ғәҙелһеҙлек эшләү, хәйлә менән алдашыу. *Хәрәмләшеп уйнау. Хәрәмләшеп эшләү.* ■ *Малайҙар кәрт һуғалар. Бөтәһе лә асыҡтан асыҡ хәрәмләшәләр.* Х. Мохтар. *[Әлемгол] Шишмә түйында үҙе кеүек үк гәйрәтле Хафиз көрәшсене саҡ ҡына хәрәмләшеп, аяҡ салып йыҡҡан.* Р. Шәкүров.

**ХӘРӘМСЕ** *и.* *һөйл.* Эштә, уйында хәрәмләшә, алдай торған кеше.

**ХӘРӘПСЕ** *и.* Һәптәнләп, һүҙ йөрөтөүсе. *Хәрәпсе ҡатын.* ■ *[Хәжәр:] Был тиклем хәрәпсе булыр икән был Хәмди. Ҡайҙан ишеткән дә, ҡайҙан килеп еткән.* Ш. Янбаев.

**ХӘРӘПСЕЛӘНЕҮ** *ҡ.* Хәрәпсе булыу. *«Хәрәпселәнеп, шикаңлап йөрөмә, ике аяғыңдың береһен атлама»,— ти ҙә куя атайым.* Н. Мусин.

**ХӘРӘПСЕЛӘҮ** *ҡ.* *һөйл.* Һәптәнләп һүҙ йөрөтөү. *Хәрәпселәп йөрөү.*

**ХӘС** *киҫ. ҡар.* **хас**[1] 2. *Хәс атаһы. Хәс йәйге көн кеүек.*

**ХӘСАРӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Зыян. *Һис бер мәхлүҡ вә башка йәнһеҙ нәмәләр хәсарәт ҡыла алмай.* М. Ғафури.

**ХӘСЕР** [*ғәр.*]: **хәсер итеү** (*йәки* **ҡылыу**) *иҫк. кит.* эш-хәлде бер генә нәмәгә ҡайтарып ҡалдырыу, сикләү. *Вә ләкин һәр урында, мосолмандар, ғүмеребеҙҙе тик ятыу ҡылдыҡ хәсер.* М. Ғафури.

**ХӘСИС** [*ғәр.*] *с.* Ерәнеү, нәфрәт тойғоһо уятҡан; әшәке, кәбәхәт. *Хәсис дошман. Хәсис йән.* ■ *Атом ағыуынан хәсистәрҙең тонған булһа кәрәк күҙҙәре.* Б. Вәлит. *Изге ҡулдарында дан ҡаҙандың, хәсис ҡулдарында хур булдың [Ҡылыс].* М. Басыров./ Әрләгәндә, кәмһеткәндә әйтелә. *Ну, һаран да инде, хәсис, бер тин өсөн бына хәҙер ер тишегенә инер.* А. Карнай. / Йән көйөп, үртәнгәндә әйтелә. *[Вәсбикамал:] Эй кәһәрең, шау ваҡ сырҙый.., күпме таҙартып ултырам, ә ул хәсис, һис ырамай.* Ш. Бикҡол.

**ХӘСИСЛЕК** *и.* Хәсис кешегә хас сифат; әшәкелек. *[Нәкиә:] Ярай, яным, һиңә окшамағас, ташлайым мин был хәсислекте.* И. Ғиззәтуллин.

**ХӘСИСЛӘНЕҮ** *ҡ.* Хәсискә әйләнеү, хәсис булыу.

**ХӘСИСЛӘҮ** *ҡ.* Бысраҡҡа әйләндереү, әшәкеләү. *Алйотҡа күп кәрәкме ни, яланға тиреҫ, көл тейәп алып китһәм дә, ул [күршем]: «Баҫыуға нәжес түгеп, изге ерҙе хәсисләй»,— тип көлә ине.* И. Ғиззәтуллин.

**ХӘСИТӘ** *и.* *этн.* **1.** Һул иңбаштан уң ҡултыҡ аҫтына төшөрөп түшкә ҡырын кейә торған тәңкә-мәрйенле ҡатын-ҡыҙ биҙәүесе; әмәйлек, дәүәт. *Хәситә кейеү.* ■ *Ҡатындар үҙҙәренең киң ҡулдәктәрен кейәләр, күкрәктәренә көмөш тәңкәләрҙән яһалған хәситәләрен аҫалар ҙа ҡунаҡҡа йөрөйҙәр.* Ғ. Хәйри.

**2.** *диал.* Бетеү.

**ХӘСИӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кем йәки нимәгәлер хас сифат; үҙенсәлек. .. *Тел белгестәре аҫыл һүҙҙәрҙең мәғәнә асылын, ҡайһы быуат төпкөлөндә яралғанын, тарих һөйләр хәсиәттәрен тоя һәм таба белергә тейеш.* Ғ. Хөсәйенов. *Һалдат кейеменең бер хәсиәте була: ул утта ла янмай, һыуҙа ла батмай, ти* (Әкиәттән).

**2.** Нимәнеңдер төбөндә ятҡан сәбәп; ғилләсер. *Турылап ҡайтыуҙың икенсе бер хәсиәте бар: ул [Сөнәғәт] еҙнәһенә заводтан йыуасаға мотлаҡ бер нәмә алып ҡайта.* Ж. Кейекбаев.

**3.** *күсм.* Мәғәнә, файҙа. *[Мулла:] Утыҙ йыллыҡ тормошом хәсиәтһеҙ булды.* Т. Хәйбуллин. *[Райзоға] барыуҙан хәҙер бер төрлө лә хәсиәт булмаҫ, барыбер һуңға ҡалынды инде.* М. Тажи.

**4.** Хис, тойғо. *[Һалдат ҡатыны] күҙ ҡарауы менән күңелендәге хәсиәтен аңламаҡсы булды.* М. Ғафури.

♦ **Ни хәсиәт** эш-хәлде хупламағанда, кәрәкһеҙ тип тапҡанда әйтелә; ни мәғәнә. *[Шакир:] Үҙебеҙгә файҙалы культураны сәсеү-сәсмәү мәсьәләһен дә хәл итә .., тормошка ашыра алмағас, беҙҙең ғалим исеме күтәреп йөрөүҙән ни хәсиәт?* Н. Мусин.

**ХӘСЛӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тәбиғәтенә хас үҙенсәлек, сифат. *[Ғәсмәтиҙең] хәсләте — исламды хөрмәт.* Ш. Бабич.

**ХӘСМӘН** [*ғәр.*] *и. һөйл.* Ҡаршылыҡ күрһәткән, ҡамасау яһаған кеше; дошман./ Әрләгәндә әйтелә. *Ҡара, ҡара, һөрһөгән хәсмән, нимә һөйләп торған була! — тип Әхтәм мулланы оторо үсекләүен белде.* В. Исхаков.

**ХӘСРӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Йөрәккә ғазап һалған ауыр кисереш; рухи ғазап; ҡайғы. *Ауыр хәсрәт. Хәсрәт утында яныу.* ■ *Шатлыҡ менән хәсрәт — ике көндәш, береһенән-бере йылғыр, көслөрәк. Бере — ләззәт, бере — ут, көйҙөрә, икәүһенә миндә бер йөрәк.* С. Кулибай./ Ғазап сиктергән һәр төрлө ҡыйынлыҡ, ауырлыҡ. *Хәсрәт күреү.* ■ *Ил өҫтөнә төшкән хәсрәттән дә ауырыраҡ хәсрәт бармы ни?* А. Игебаев. *Донъя хәсрәттәрен күрмәйенсә ир булмайҙыр ата балаһы* (Халыҡ йырынан).

**2.** Кемгәлер асыуланғанда, ризаһыҙлыҡ белдереп үртәнгәндә әйтелә. *Йыйын хәсрәттәр! Кит хәсрәт!* ■ *[Ғәлиәкбәр кеүектәр] юғарыға ярай белә, түбәнде ҡаға белә. Бына ошо хәсрәткә көн төштө быйыл.* З. Биишева. *[Аллабирҙе — Ишкилдегә:] Әллә үҙең дә быҙауға әйләнә башланыңмы? Бөтәһенә лә риза булып ултыраһың, хәсрәт.* А. Мөбәрәков.

◆ **Тере хәсрәт** булдыҡһыҙлығы менән йәнде үртәгән кеше; тере көйөк. *[Миңлекамал Мөхиткә:] Председатель бит ул бөтә ауылға хужа. Ул аҡыллы ла, тәжрибәле лә, авторитетлы ла булырға тейеш һин кем һуң?.. Я хоҙай тере хәсрәт булаһың икән.* Д. Исламов. **Хәсрәт ҡатыуы** *диал.* ҡулынан эш килмәһә лә, үҙен шәпкә һанап йөрөгән кеше; буш ҡыуыҡ. **Хәсрәт тоҡсайы** юҡтан ҡайғы табып кеше бимазалап йөрөгән кешегә кәмһетеп әйтелә.

**ХӘСРӘТЛЕ** *с.* Хәсрәт кисергән; ҡайғылы. *Хәсрәтле кеше.* ■ *Етем баланың төҫөнән үк етем икәне беленеп тора, кескенә булһа ла, ҙур кешеләр кеүек, хәсрәтле була ул.* М. Ғафури. // *Хәсрәтлеләр күрһәгеҙ беҙҙе иҫкә алығыҙ* (Бәйеттән)./ Хәсрәт, ҡайғы тулы, ҡайғылы. *Хәсрәтле минуттар.* ■ *Бынау хәсрәтле, бошонҡо көндө кем улай мәжлес ҡороп ята икән?* Р. Солтангәрәев. *Йәмле Агиҙел буйҙары ла бөтөрәлер хәсрәтле уйҙарҙы* (Халыҡ йырынан). / Хәсрәт, моң һағыш белдергән; борсоулы. *Бәләкәй генә Вәсим .. хәсрәтле тауыш менән: килә һе йылға мин дә ҡушылырмынмы, әбекәй,— тине.* Б. Мирзанов.

**ХӘСРӘТЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Хәсрәткә, ҡайғыға һалыу; ҡайғыртыу. *Кешене хәсрәтләндереү.*

**ХӘСРӘТЛӘНЕҮ** *к.* Ауыр кисерешкә бирелеү, хәсрәт кисереү; ҡайғырыу. *Хәсрәтләнеп йөрөү. Хәсрәтләнеп йәшәү.* ■ *Илем хәсрәтләнһә, бергә ҡайғы йотам, ил һөйөнһә, ҡанатланып шатланам мин.* С. Ҡудаш. *Куҙһеҙ ҡалған Заятүләк .. ҡайғырып, хәсрәтләнеп ултырғанда, уны Һыуһылыу килеп таба.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ХӘСРӘТЛӘҮ** *к. һөйл.* Хәсрәтле итеү; ҡайғыртыу. *Ҡуҙыев меҫкен вафат булғас, хәсрәтләр инде күп йылға* (Халыҡ йырынан).

**ҲӘСТЕК** *и. диал.* **1.** *ҡар.* **хаслыҡ.** *Хәстек ҡылыу. Хәстек уйлау.*

**2.** *с. мәғ. ҡар.* **хас**[2]. *Хәстек кеше. Хәстек булыу.*

**ХӘСТРҮШ** *с. һөйл.* Эшкинмәгән, йүнһеҙ. *[Сираев Бикмөхәмәтовка:] «Яҙыуың да үҙең кеүек хәстрүш кенә икән»,— тип көлдө.* Н. Мусин. *[Иренә Мәфрузә:] Һин хәстрүш гармунсының үҙе ни ҙә көйө ни, йөҙө ни ҙә һыйы ни.* Й. Солтанов. // *Мөхәббәтемде ниндәйҙер хәстрүш менән уртаклаша алмайым мин.* Ф. Әсәнов.

**ХӘСТӘ** [*фарс.*] *и. һөйл.* **1.** Ауырыу, сир. *Хәстә булыу. Хәстә итеү. Бик ҡаты хәстәгә тарыным.*

**2.** *с. мәғ.* Ауырыуға дусар булған; сирле. *Хәстә кеше.* // *Хәстәне аяҡка баҫтырыу.* ■ *[Тәттә] Күрше ауыл Шәйсолтан хәстә булып ята.. Өшкөрөп-төкөрөп кенә йүнгә кертерлек түгел — бик ҡаты һалҡын алдырған.* Ә. Мирзаһитов.

□ **Хәстә итеү** (*йәки* **ҡылыу**) ауырыуға һабыштырыу, сирләтеү. *Бәддоға берлә күп кешеләрҙе фәҡир вә хәстә ҡылды.* З. Һаҙыев.

**ХӘСТӘЛЕК** *и. һөйл.* Ауырыу, сир. *Сафия апай .. ҡайтыу менән түшәккә йығылып, күпмелер ауырып ятҡандан һуң, ҡукрәк хәстәлеге менән вафат булды.* М. Ғафури./ Сирле булған хәл. *[Тукай:] Бер театрға, бер музейға барып булманы. Әлеге хәстәлек.* З. Шәрҡи.

**ХӘСТӘЛӘҮ** *к. һөйл.* Ауырыу хәлендә булыу; сирләү. *Йыш күренгән ул табипка хәстәләп иртә, кисен.* Д. Юлтый.

**ХӘСТӘР** *и.* **1.** Ниҙелер булдырыу, әҙерләүгә бәйле эш, мәшәҡәт; нимәнелер алдан ҡайғыртыуға бәйле ығы-зығы. *Донъя хәстәре. Мал хәстәре. Хужалыҡ хәстәре. Бесән хәстәрен күреү. Ҡышҡа әҙерлек хаҡында алдан хәстәр күреү.* ■ *[Миңнегәле:] Һин, Маһира, ҡарттар менән кәңәшләш. Колхоз эше ҡырҡ хәстәр, уны үҙең генә бөтөрә алмаҫһың.* Х. Ғиләжев. *Өй хәстәрен-ниен бөтөргәс тә халыҡ салғы, ураҡ ҡулға алды.* Ғ. Амантай. *Яҙ башланыу менән Ғафури ҡармаҡ, ҡармаҡ ептәре әҙерләү хәстәренә кереште.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Кемделер ҡайғыртыу, ҡурсалауға бәйле мөғәмәлә; хәстәрлек. *Кеше хәстәренә мохтаж булыу.* ■ *Хәстәренән мәхрүм итмәгән.., мул уңышын биргән ер өсөн, һуғыштарҙа сңгән ир өсөн! — тип күтәрҙе тосты ҡартыбыҙ.* С. Кулибай. *Һис тә уйламаған ине, булыр тиҡ шундай хәстәр, ата-бабаһы күрмәгән хөрмәтте күрҙе Әхтәр.* М. Сөндөклө.

**3.** Ниндәйҙер мәшәҡәт нигеҙендә тыуған борсоулы уй. *Башҡа хәстәр төшкәндә ситтә йөрөү бик ауыр* (Халыҡ йырынан).

**ХӘСТӘРЛЕ** *с.* **1.** Алдан хәстәрен күргән, алдан ҡайғыртыусан; булдыҡлы. *Хәстәрле кеше.*

**2.** Кем йәки ниҙер өсөн борсолған, кемгәлер яҡшы мөғәмәлә күрһәткән, ҡайғыртыусан. *Сәлим. тигән бер пионер ҡоштарҙы бик ярата, айырыуса хәстәрле ул күгәрсенгә ҡарата.* Ҡ. Даян.

● *Ир хәстәрле булһа, ҡатын таҫтарлы булыр.* Әйтем.

**ХӘСТӘРЛЕК** *и.* **1.** Нимәлер әҙерләүгә, нимәлер тураһында ҡайғыртыуға бәйле эш. *1922 йылдан башлап башҡорт телен гәмәлгә ҡуйыу хаҡында хәстәрлек көсәйә.* Ғ. Рамазанов.

**2.** Кем йәки ниҙелер ҡурсалап, уның тураһында ҡайғыртыу мәшәҡәте. *Ауырыу тураһында хәстәрлек. Көндәлек хәстәрлек. Хәстәрлек күрһәтеү. Хәстәрлеккә мохтаж булыу.* ■ *Был хәтле йомартлыҡҡа, хәстәрлеккә һөнәрсенең күңелендә тыуған рәхмәттең иге-сиге булмай.* З. Биишева. *Рәхмәт, дуҫҡайым, һиңә, хәстәрлегең ҙур миңә.* А. Игебаев.

□ **Хәстәрлек итеү** (*йәки* **күреү**) ҡайғыртыу, хәстәрләү. *[Әлфиә:] ҡалған эшкә ҡар яуа, тиҙәр. Алдан хәстәрлек күрергә кәрәк.* С. Кулибай.

**ХӘСТӘРЛЕКЛЕ** *с. ҡар.* **хәстәрле.** *Хәстәрлекле кеше.*

**ХӘСТӘРЛЕКҺЕҘ** *с. ҡар.* **хәстәрһеҙ.** *Хәстәрлекһеҙ кеше.*

**ХӘСТӘРЛӘНЕҮ** *к. һөйл.* Үҙ-үҙеңде ҡайғыртыу, үҙ ихтыяжыңды үҙең хәстәр итеү.

**ХӘСТӘРЛӘҮ** *к.* **1.** Ниҙелер булдырыу, эш итеү хаҡында борсолоп уйлау; хәстәрлек итеү. *Утын хәстәрләү. Ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ хәстәрләү.* ■ *Мәүлиә тиҙ генә ашау ягын хәстәрләргә тотонdo.* С. Агиш.

**2.** Кемдеңдер кәрәк-хәжәтенә һәм үҙенә ҡарата һәр яҡлап иғтибар күрһәтеү; ҡайғыртыу. *Ҡыҙ*

*ярата кешеләрҙе, хәстәрләй, яна-көйә. Мөхәббәт ҙур, ә йөрәге бирәүҙе генә һөйә.* Х. Ғиләжев.

**ХӘСТӘРҺЕҘ** *с.* Донъя, хужалыҡ кәрәк-ярағын алдан хәстәрләй, ҡайғырта белмәгән; вайымһыҙ.

**ХӘСТӘРҺЕҘЛЕК** *и.* Алдан хәстәрен күрмәгән, вайымһыҙ хәл; вайымһыҙлыҡ.

**ХӘСТӘХАНА** [*фарс.*] *и. иҫк.* Дауалау йорто; больница. *[Әнкәм] Үгәй атамдан шәһәр хәстәханаһына алып барыуын үтенһә лә, алып барманы.* А. Таһиров.

**ХӘСӘД** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Көнсөлөк. *Әйтмәймен бынау һүҙҙе хәсәд өсөн.* Аҡмулла.

**ХӘСӘН** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Матур, яҡшы. *Бүтәндә хәсиәтен бар тип белмәҫ, үҙенә хәсән зәинде хәсер ҡылһа.* Аҡмулла.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ХӘТ** *и. иҫк. кит. ҡар.* **хат** [2]. *Шундай авторҙар бар, уларҙың ижадында яңғырауыҡлы һүҙҙәр хәттин ашҡан.* Н. Нәжми.

**ХӘТЕМ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Мисәт, мөһөр. *Юл буйында кәбән күрһә, бесән талар. Мужик тотһа, күҫәк хәтемен бирер имде* (Мөнәжәттән).

□ **Хәтем итеү** (*йәки* **ҡылыу**) 1) мисәт баҫыу; дөрөҫләү. *Белгән-күргән муллаларҙың күбеһе шуны хәтем иткән.* Ғ. Ибраһимов; 2) ҡөрьәнде уҡып сығыу; тамамлау.

◆ **Хәтем кәләм** «һүҙем тамам» мәғәнәһендә ҡулланыла. *[Сабир мулла:] Хуш, сәләмәт булығыҙ, хәтем кәләм.* Б. Ишемғол.

**ХӘТЕР** [*гәр.*] *и.* **1.** Күргән-белгәнде онотмай башта һаҡлау һәм иҫкә төшөрә алыу һәләте; иҫ. *Яҡшы хәтер. Хәтерҙә ҡалыу. Хәтерҙән сығарыу. Хәтерҙә тотоу. Хәтер томаланыу.* ■ *Юйылмаҫ хәтеремдән ташҡа киҫкән яҙыу кеүек.* М. Хәй. *Талҡанбайҙың хәтер ҡаҡшаны, онотоусан була башланы.* С. Ҡудаш. **Хәтергә алыу** күргән-белгәнде күҙ алдына килтереп уйлау; иҫкә төшөрөү. *Һөйлә, бәгерем, һағынып хәтәргә ал, хәтерҙәр табышҡан көндәрҙе.* С. Ҡудаш. **Хәтергә килеү** (*йәки* **төшөү**) хәтергә төшөп, күҙ алдына килеү; иҫкә төшөү. *Ырымбурҙағы бер уҡытыусы хәтергә килде.* С. Агиш.

**2.** Кешенең билдәле бер ваҡыттағы рухи хәле; күңел, кәйеф. *Хәтер һаҡлау. Кешенең хәтерен ҡырыу.* ■ *[Әсәһе] буйға-һынға еткән баланың хәтерен йыҡманы.* Д. Юлтый. *Сәсәнгә тиң кем булһын: яманлыҡты яҡламаҫ, дошман хәтерен һаҡламаҫ* (Ҡобайырҙан). **Хәтер ҡалыу** ниҙелер ауырға алып, үпкәләү, рәнйетеү. *Яттарға бит ихлас асылып булмай һәм хәтер ҙә ҡалмай яттарға.* Х. Назаров. *Уҙған ғүмер, ҡалған хәтер һатып алам тиһәң дә табылмай* (Халыҡ йырынан). **Хәтерен табыу** кемдең булһа ла күңелен күреү.

◆ **... тимәһәң, хәтере ҡалыр** талапҡа ярашлы булмаған нәмәгә ҡарата мыҫҡыл менән әйтелә. *Ҡапҡа тимәһәң, хәтере ҡалыр, йүкәнән эшләнгән өс йәпле нәмә инде шунда.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 28 ноябрь. **Хәтер йомғағын һүтеү** үткән хәтирәләрҙе бербер артлы иҫкә төшөрөү. *Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан Муллағәлиев .. ауылдаштарына үҙенең хәтер йомғағын талғын ғына һүтә ине.* Ш. Янбаев. **Хәтергә һеңдереү** онотмаҫлыҡ итеп иҫтә ҡалдырыу. *Кейәнең ҡайһы яҡҡа ҡарап торғанын улар [корттар] хәтерҙәренә ныҡ һеңдерергә тейештәр. Шунһыҙ өйгә кире инә алмаяҫаҡтар.* Ф. Иҫәнғолов.

● *Ҡалған хәтерҙең ҡары китһә лә боҙо китмәҫ.* Әйтем.

**ХӘТЕРҘӘН** *р.* Яттан, ятҡа. *Хәтерҙән һөйләү.* ■ *Бабич иҫ киткес хәтерле кеше. Хатта иң ҙур әҫәрҙәрен дә хәтерҙән генә һөйләй ине.* С. Ҡудаш.

**ХӘТЕРЛЕ** *с.* Хәтере яҡшы булған; иҫле. *Шәһит минең күңелемдә һәр нәмәнең асылын, дөрөҫөн белергә теләгән, ваҡ ҡына нәмәне лә онотмаған тәрән хәтерле кеше булып ҡалған.* С. Агиш.

**ХӘТЕРЛӘНЕҮ** *ҡ.* Ниндәйҙер сифатта иҫтә ҡалыу йәки хәтергә килеү. *Бала саҡ хәтерләнә.*

**ХӘТЕРЛӘТЕҮ** *ҡ.* Иҫкә төшөрөү, күҙ алдына килтереү. *Тәҙрәнән йымылдап күренгән нурлы таң сулпаны Гөлйөҙөмдөң күҙҙәрен хәтерләтте.* Һ. Дәүләтшина./ Кем йәки нимәгәлер оҡшау, кем йәки нимәлер һымаҡ күренеү. *Башҡортостан үҙенең карталағы рәүеше менән кеше йөрәген хәтерләтә.* Ә. Харисов.

**ХӘТЕРЛӘҮ** [1] *ҡ.* **1.** Онотмай, иҫтә тотоу. *Чапаевтың йөҙгән минуттарын хәтерләйҙәр Урал ярҙары.* Р. Ниғмәти.

**2.** Иҫкә, хәтергә төшөрөү. *Хәтерлә һин мине, яҙғы ҡайын елбер-елбер шәлен ҡаҡҡанда; хәтерлә һин мине, ҡыр ҡаҙҙары ҡаңғылдашып кире ҡайтҡанда.* Ә. Таһирова.

**ХӘТЕРЛӘҮ** [2] *и. йыйн.* Башта, зиһендә һаҡланған һәр төрлө хәтирәләр. *Ҡайҙа барма — үткән иҫкә төшә, ә үткәндәр алыҫ ҡалалар; шулай инде — ғүмер уҙған һайын хәтерләүҙәр арта баралар .. Алда — хыял. Артта — хәтерләүҙәр .. кеше йәшәй ошо уртала.* Н. Нәжми.

**ХӘТЕРҺЕҘ** *с.* Тиҙ генә онотоп барған; хәтере, иҫе булмаған. *Хәтерһеҙ кеше. Хәтерһеҙ булыу.*

**ХӘТЕРҺЕҘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Хәтерһеҙгә әйләнеү, хәтерһеҙ булыу; хәтер насарланыу, онотоусан булыу. *Хәтерһеҙләнеп китеү.*

**ХӘТИРӘ** [*гәр.*] *и.* **1.** Хәтерҙәге, иҫтәге төрлө хәл-ваҡиға; иҫтәлек. *Йәшлек хәтирәләре. Хәтирәләр һөйләү.* ■ *Хәтирәнең була төрлөләре, төн кеүеге, йәйгор төҫлөһө, хәтирәне ғүмер буйы һаҡлай күңелдәрҙең тәрән хислеһе.* А. Игебаев. / Үткән көндәрҙәге хәл-ваҡиғаларҙы һәм кешеләрҙе иҫкә төшөрөп яҙған әҫәр; иҫтәлек, мемуар. *Хәтирә яҙыу.* ■ *Хәтирә күп ҡырлы жанр, уға көндәлектәр, иҫтәлектәр, автобиография һәм башҡалар инә.* К. Әхмәтйәнов.

**2.** Хәл-ваҡиғаны иҫкә төшөрөрлөк нәмә. *Ауылдаштары, ошо оҙатыу кисәһенең хәтирәһе итеп, Нәжметдиндең ҡулына сәғәт таҡты.* М. Хәйҙәров.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

◆ **Хәтирә дәфтәре** хәтирәләр яҙған махсус дәфтәр; көндәлек. *[Ҡазан ҡалаһы] тураһында алған тәьҫирҙәрҙе хәтирә дәфтәрҙәрендә һаҡларға тура килә.* М. Ғафури.

**ХӘТИРӘЛЕ** *с.* Хәтерҙә, иҫтә ҡалырҙай; иҫтәлекле. *Хәтирәле бүләк.* ■ *Көндәрҙең береһе айырыуса хәтирәле булды. Дивизия командиры*

*полковник М. М. Шайморатов килде.* С. Әлибаев.

**ХӘТЛЕ(М)** *бәйл.* **1.** Төбәү килешендәге һүҙҙәр менән килеп, урын-ваҡыт арауығының сиген билдерә; саҡлы, тиклем. *Йылғаға хәтле барыу. Кискә хәтле.* ■ *Бураншаны ул күндә яр буйына хәтле эсәһе, кәләше, ҡыҙы оҙатып бара.* З. Биишева. *Ул [бәлә] егерме биш йыл буйы, һалдаттың хеҙмәте бөткәнгә хәтле, артынан ҡалмай интектереп, яфаға һалып йөрөгән, ти* (Әкиәттән).

**2.** Сағыштырмаса ҙурлыҡты, күләм-дәрәжәне белдерә. *Ат башы хәтлем. Башмаҡ хәтлем.* ■ *И, мәшһүр хан.., күпме булһа көмөш сәстәрең, шул хәтлем бит һинең гәскәрең.* М. Кәрим. *Бына бер заман ала бейә бер ҡара урман уртаһындағы йоҙроҡ хәтле генә бер өй алдына килеп туҡтаны, ти* (Әкиәттән).

♦ **Был** (*йәки* **шул**) **хәтле** әйтелгән фекерҙе көсәйтеп килә; шул тиклем, шундай. *Шул хәтле һыуыҡ. Шул хәтле телгә оҫта.* **Ни хәтле** күпме, нисек кенә. *Ни хәтле көсләшһә лә Тамыр батыр Мәскәйҙең һыйын ауыҙ итеп тә ҡараманы, ти* (Әкиәттән). **Әллә ни хәтле** бик күп, иҫәпһеҙ. *Уның ҡарты ла бик уңған кеше. Йәш сағында әллә ни хәтле бүре һуҡҡан.* Ғ. Дәүләтшин.

♦ *Табылмаған мал тау хәтле.* Мәҡәл.

**ХӘТФӘ** *и.* **1.** Уң яғы ҡыҫҡа ғына ҡуйы өбөрөлө итеп һуғылған йылтыр туҡыма; бәрхәт. *Йәшел хәтфә. // Хәтфә камзул.* ■ *Алтын әйәр, хәтфә мендәр һалдым ерән ҡашҡаға* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Күпереп, йәшәреп торған нәмәгә, болонға ҡарата әйтелә. *Агроном Әлфиә «Өс партизан» колхозына май аҙағында, баҫыуҙар хәтфәгә төрөнгәс, килеп төштө.* Ф. Әсәнов. *// Тәҙрә аша беҙҙең алдан үтә ҙур ҡалалар, шаулы урмандар, оҙатып бара хәтфә болонлоҡтар, ялан ерҙә тулҡый ҡылғандар.* Ғ. Сәләм.

♦ **Хәтфә гөл** *шул уҡ* **бәрхәт гөл** (*ҡар.* **гөл**).

**ХӘТФӘЛЕ** *с.* Хәтфә (2 мәғ.) рәүешендәге, күпереп, йәшәреп торған. *Ул минең халҡым, ул минең ерҙәр, йәшел урмандар, хәтфәле ҡырҙар.* М. Хәй.

**ХӘТФӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Йәшел хәтфә төҫөн алыу, йәшелләнеү. *Яҙ көнөндә хәтфәләнгәс ер өҫтө, хистәр менән ҡайнап тыуған хис төҫлө.* С. Ҡудаш.

**ХӘТҺЕҘ** *с.* Күп кенә, байтаҡ. *Хәтһеҙ юл үтелде. Хәтһеҙ ғүмер йәшәлде. // Эш хәтһеҙгә һуҙылды. Хәтһеҙ эшләү.* ■ *Ауылдан сығып хәтһеҙ ер киткәс, Хажигәле артына боролоп ҡараны.* М. Тажи. *Шашынып яуған ямғыр ысынлап та оҙаҡҡа һуҙылманы. Шулай булһа ла юлды хәтһеҙ иҙергә өлгөрҙө.* Я. Хамматов.

**ХӘТӘР** [*ғәр.*] I *и.* Бәлә килтергән яман нәмә; хәүеф. *[Кинйә — ағаларына:] Күлдең тирә-яғы ҡуйы ҡамышлыҡ булыр. Шул күл эргәһендә хәтәр бар, туҡтай күрмәгеҙ* (Әкиәттән).

II *с.* **1.** Ниндәйҙер хәүефе булған; яман, ҡурҡыныслы. *Бик хәтәр ваҡыт. Хәтәр төш. Хәтәр юлға сығыу.* ■ *Ҡыуғын эше бик хәтәр эш: тамырға эләгеп торған йә ағас төбөнә эркелеп тығылған бүрәнәләрҙе бағур менән төрткөләп ағыҙғанда, ҡыуғынсы ҡай саҡта яҙатайым һыуға төшөп, ағып та китә.* Ж. Кейекбаев. *Ниңә заман хәтәр һаман, ниңә дары еҫе бөтмәй.* А. Игебаев./ Бик ҡаты, көслө, ҙур. *Хәтәр ел. Хәтәр ялҡын.* ■ *Кеше ҡайғыһы бик хәтәр нәмә инде ул,— ер билен һығылдыра, тау-ташты илата.* Ә. Вахитов. *Үҙебеҙ шаһит.., үтте илдән хәтәр яуҙар.* Ғ. Рамазанов.

**2.** *күсм.* Ҡырҡыу холоҡло, ҡыҙыу, дыуамал, уҫал, ажарлы. *Хәтәр кеше. // Хәтәр һөйләй. Хәтәр эшләй.*

**3.** *киҫ. мәғ.* Бик, үтә, ғәжәп. *Хәтәр шәп йырлай. Хәтәр матур кеше.*

♦ **Хәтәр икән** нимәнелер хупламай, кәмһетеп әйткәндә ҡулланыла.

**ХӘТӘРЛЕ** *с.* Ниндәйҙер ҡурҡынысы, хәтәре булған; хәүефле. *Ололар йоҡонан бик йыш уянып, хәтәрле тауыш юкмы икән тип, ҡолаҡ һалып тыңлайҙар.* Һ. Дәүләтшина.

**ХӘТӘРЛӘНЕҮ** *ҡ.* Хәтәргә әйләнеү, хәтәрле булыу. *Донъя хәтәрләнде.*

**ХӘҮЕЗ** *и. ҡар.* **хауыз.**

**ХӘҮЕФ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Бәхетһеҙлек килтергән нәмә; бәлә-ҡаза. *Хәүеф һалыу.* ■ *Мине күптән еңгән булыр ине .. ҡаты яралар, һин тормаһаң әгәр ҡалҡан булып [әсәй], хәүеф менән минең арала.* М. Кәрим./ Ҡурҡыу, шикләнеүҙән килгән тойғо; шом. *Хәүеф һалыу. Хәүеф уятыу.* ■ *Уның [Камилдың] бөтә ҡыланышы Емеш күңелендә .. хәүеф уята.* З. Биишева.

**2.** Ҡурҡытып, шомландырып торған хәл. *Әле һуғыш.. Әле ҡорбандар бар һәм хәүефтә әле кешелек.* Х. Ғиләжев.

♦ Хәүеф **намаҙы** *дини* бәлә-ҡазанан һаҡлай торған намаҙ.

**ХӘҮЕФЛЕ** *с.* **1.** Хәүеф һалырлыҡ; ҡурҡыныслы. *Хәүефле хәл. Хәүефле эш. Хәүефле булыу.* ■ *Дыуамал тау йылғалары аша һалынған соҡорло-саҡырлы, тау-ташлы хәүефле юл үтәһе бар.* Д. Исламов. *Әллә ниңә йылдар хәүефле, тәбиғәтме быға гәйепле?* М. Ғәли.

**2.** Күңелгә борсоу һалған; шомло. *Хәүефле хәбәр. Хәүефле тауыш.* ■ *Ерән ҡашҡаның бик хәүефле бышҡырыуы ишетелде.* Й. Солтанов.

**ХӘҮЕФЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Хәүефкә ҡалдырыу; шомландырыу. *Кешене хәүефләндереү.*

**ХӘҮЕФЛӘНЕҮ** *ҡ.* Шомланып ҡурҡып, хафаланып борсолоу. *Сир йоғор тип хәүефләнеү. Бурандан хәүефләнеп юлға сыҡмау.* ■ *Риданың һораүҙарына ла ул [Заман] йүнләп яуап ҡайтарманы. Ниҙер һиҙеп хәүефләнгән Рида уны клубтан алып китергә ашыҡты.* Ә. Вәли.

**ХӘҮЕФ-ХӘТӘР** *и. йыйн.* Һәр төрлө ҡурҡыныс хәл; бәлә-ҡаза, бәхетһеҙлек. *Хәүеф-хәтәрҙән һаҡланыу.* ■ *Бирешмәсе, зинһар, бирешмәсе. Яҙыла күр инде, әсәйем! Тағы ла бер аҙ һинең ышығыңда хәүеф-хәтәр күрмәй йәшәйем!* М. Кәрим.

**ХӘҮЕФ-ХӘТӘРҺЕҘ** *с. ҡар.* **хәүефһеҙ.**

**ХӘҮЕФҺЕҘ** *с.* **1.** Хәүеф-хәтәре булмаған, тыныс. *Хәүефһеҙ заман. Хәүефһеҙ урын.* ■ *Ездовойҙар пушкаларҙы күҙ асып йомғансы ыҫҡындырып, аттарҙы хәүефһеҙ урынға алып киттеләр.* Ә. Ихсан.

**2.** *р. мәғ.* Бәлә-ҡазаһыҙ; иҫән-һау, имен-аман. *Хәүефһеҙ йәшеү. Хәүефһеҙ йөрөү.*

**ХӘҮЕФҺЕҘЛЕК** *и.* Хәүеф-хәтәрһеҙ, бәлә-ҡаҙаһыҙ, тыныс хәл. *Улар бары трубачтын сигнал ҡысҡыртыуын һәм хәүефһеҙлекте күрһәтә торған ҡыҙыл, аҡ шарҙың береһенең юғары күтәрелеп, икенсеһенең түбән төшөүен генә көҙәтәләр.* Н. Ҡәрип.

♦ **Хәүефһеҙлек техникаһы** хеҙмәт шарттарының хәүефһеҙлеген тәьмин иткән төрлө сара һәм алымдар системаһы. *Хәүефһеҙлек техникаһын яҡшыртыу.*

**ХӘҮЕФҺЕҘЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Хәүефһеҙ итеү. *Нисек кенә булмаһын, үҙебеҙҙекеләрҙе хәүефләндереү өсөн был ут нөктәләрен юҡ итергә кәрәк.* «Ағиҙел», 1973, № 10.

**ХӘҮЛӘ** [*ғәр.*]: **лә хәүлә** *дини* 1) көс юҡ, ҡеүәт юҡ, тигән мәғәнәне белдерә; 2) ошо һүҙ менән башланған доға исеме. *Лә хәүлә уҡыу. Лә хәүлә әйтеү.*

**ХӘФИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Билгеһеҙ, йәшерен. *Хәфи булыу.* ■ *Хисаплай ул үҙен мулла, суфый, тип, бөтә серҙәр асыҡ йортҡа хәфи, тип* (Ҡобайырҙан).

**ХӘФИӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Башҡалар белергә тейеш булмаған йәшерен нәмә; сер. *[Туҡтамыш Ҡара Ҡыпсаҡҡа:] Ҡараңғыла юл сыҡҡан, хәфиә лә һүҙ тапҡан* (Ҡобайырҙан).

**ХӘШЕР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Йыйылыш. *Гүйә ҡупты ҡиәмәт, королдо диуане хәшер.* «Ғибратнамә».

**ХӘШИШ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һинд киндеренең инәлек сәскәһенән алына торған наркотик матдә. *Хәшиш тартыу.*

**ХӘШӘП** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Утын ағасы.

**2.** *күсм.* Тупаҫ, наҙан; ахмаҡ. *Күп хәшәп алды мөдәррислек.* Ш. Бабич.

**3.** *күсм.* Тупаҫ, оятһыҙ, эшәке һүҙ. *Поручик, эллә һин донъяға бисә-сәсә тураһында хәшәп һөйләргә генә тыуҙыңмы?* Ә. Мирзаһитов.

**ХӘШӘРӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ерәнеү, ытырғаныу тойғоһо уятҡан йән эйәһе. *Стена буйҙарын ҡандала, ҡырҡаяҡ кеүек хәшәрәттәрҙән йырып алғыныҙ.* Т. Хәйбуллин./ *күсм.* Әшәке, бысраҡ нәмә. *Мин был ерҙе матурларға тыуҙым, таҙартырға тыуҙым йыйын хәшәрәттән, шаҡшынан һәм төҙөргә уны мәңгелеккә тик гүзәлдән, ныҡтан, яҡшынан!* Ә. Атнабаев.

**2.** Бысраҡ уйлы, яуыз кеше. // *Хәшәрәт кеше.* ■ *Әгәр дошман балыҡ булып һыуға сумһа, .. бел: урын юҡ хәшәрәткә беҙҙең һыуҙа — сыртан булып дөрөп сығар, батыр улым!* Р. Ниғмәти./ Әрләгәндә әйтелә. *Юҡ, Фәхри мулла, шайтан түгел .. һин үҙең муллалығыңды ташлап, шайтанға әүерелгәнһең. Тфу, хәшәрәт йән!* М. Тажи.

**ХӘШӘРӘТЛЕК** *и.* Насар, яуыз эш. *Хәшәрәтлек ҡылыу. Хәшәрәтлек эшләү.*

**ХӘШӘРӘТЛӘНЕҮ** *ҡ.* Хәшәрәткә, эшәкегә әйләнеү, хәшәрәт булыу.

**ХӘШӘФ: хәшәф үлән** ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған эре киртләс япраҡлы, төҙ, бейек һабағының башында ҡатлауланып торған миләүшә төҫөндәге бер тумалаҡ сәскәһе булған күп йыллыҡ үлән.

**ХӘЯ** *и. иҫк. ҡар.* **хая.**

**ХӘЯЛАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡараңғылыҡ, наҙанлыҡ. *Ҡайҙа тынлыҡ, ҡайҙа эшһеҙлек, хәялат һәм хафа — унда зиндан, унда гүр.* Б. Ишемғол.

**ХӘЯТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит. ҡар.* **хаят** 2. *Таң тынлығы һуңынан яңғырап торған, йән тирбәткән хәят уянды.* Ғ. Амантай. *Ер йөҙөнә хәят, йәнгә шатлыҡ бирә торған йәнле май бит ул.* М. Ғафури.

# Һ

**Һ** [һа] Башҡорт алфавитының утыҙ беренсе хәрефе.

**ҺА** *ымл.* **1.** Нимәгәлер ҡапыл ғәжәпләнгәндә әйтелә. *Ул [Вәхит] ҡапыл башын күтәреп: «һа, ҡайтып та еткәнмен икән»,— тип ҡуйҙы.* Ғ. Хәйри.

**2.** Нимәгәлер ышанмаған һымаҡ итеп, көлөп ҡарағанда әйтелә. *Ниңә һин яңғыҙ ғына бында, туташ? һа!.. Имеш, ул һыу янында һал ҡарай!* Ш. Бабич.

**ҺАБА** *и.* Эре малдың көүҙә тиреһенән тегеп ыҫланған ҡымыҙ һауыты. *һаба ҡымыҙы. һаба тегеү.* ■ *Табындағы табаҡ-табаҡ ит ашалып, һабаларҙағы ҡымыҙ эселеп бөткәс, хан көрәш башларға әмер бирә.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». **һаба аяғы** һаба ултырта торған ҡулайлама. *Ишек төбөндә өлкән ҡара һаба тора. һаба аяғы менән бешкәгенә көмөш сабылған.* Х. Ғәбитов.

♦ **һаба итек** *ҡар.* **итек. һаба йыйыу уйыны** туйҙағы дөйөм хөрмәттән һуң ҡыҙ яғынан килгән йәш ҡоҙаларҙың һыйҙан ҡалған ҡымыҙҙы, аҙыҡты йыйып, аулаҡта ойошторған уйыны.

**ҺАБАҒЫС** *и.* Йөн тетә торған шыйыҡ сыбыҡ. *һабағыс менән йөн тетеү.*

**ҺАБАҠ** [1] *и.* **1.** Үҫемлектең япрағы, сәскәһе, емеше урынлашҡан тупраҡтан өҫкө өлөшө. *Картуф һабағы.* ■ *Тармаҡ-тармаҡ булып һабаҡтары үҫеп ултыра бер гөл янымда.* Ш. Бабич. **һабаҡ ебәреү** һабағы барлыҡҡа килеү (үҫемлектәргә ҡарата). **һабаҡҡа ултырыу** һабағы ныҡынып үҫеү (ғәҙәттә башаҡлы культураларға ҡарата). **һабаҡҡа үҫеү** (*йәки* **китеү**) һабағы артыҡ ҙурайыу йәки орлоҡ, емеш бирмәй тик һабағы ғына ҙур булып үҫеү.

**2.** Билдәле бер оҙонлоҡтағы тегәр еп; һаплам. *Бер һабаҡ еп.*

**3.** Нуҡтаның эйәк аҫтынан үткәреп бәйләнгән бауы; теҙген.

♦ **Арҡа һабағы** *ҡар.* **арҡа 1. һырға һабағы** *этн. ҡар.* **һырға.** *[Зөлхизәнең атаһы Ҡәҙерғолға:] Беҙ Арыҫландың атаһы менән балалар бәләкәй саҡта уҡ ҡоҙа булыштыҡ. Зөлхизә менән Арыҫлан һырға һабағы алмаштылар.* Ә. Харисов.

**ҺАБАҠ** [2] *и. иҫк.* **1.** Уҡыу-уҡытыу эше, шөғөлө. *һабаҡҡа барыу. һабаҡҡа төшөү.* ■ *Матур яҙҙар етте, һабаҡ бөттө, һабаҡ бөткәс бигерәк күңелһеҙ.* Х. Ғәбитов. *Ҡыҙҙар тороп бик иртә бары һабаҡҡа китә.* М. Ғафури. / Дәрес. *һабаҡ алыу. һабаҡ биреү. һабаҡ уҡыу.* ■ *Исмәғил һигеҙ йәшенә етеп, үҙҙәренең ауыл муллаһына һабаҡҡа йөрөй башлай.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *күсм.* Эш, ҡылыҡ өсөн тормош тәжрибәһенән алынған ғибрәтле өлгө, аҡыл; фәһем. *Тарих һабағы. Һабаҡ алыу. Һабаҡ булыу.* ■ *Юҡ-юҡ. Бирешмәҫтәр,— Октябрҙең батыр улдары. Юлдар айҡап, күрәш һабаҡтарын тылҡай-тылҡай үҫкән батырҙар еңелмәҫтәр мәңге!* Ғ. Амантай. *«Ярар,— тине Ҡәмәр,— киләсәктә һабаҡ булһын бына үҙеңә. Бер нәмәне алға алған булһаң, аҡ-ҡара күренмәй күҙеңә.* Т. Йәнәби.

♦ **Арт һабағын уҡытыу** эшен килтереү, кәрәген биреү. *[Лейтенант Дәүләтов станковый пулемёт янына китте:] Егеттәр, давай, фрицтарҙың арт һабағын уҡытайыҡ әле,— тине ул.* Ә. Ихсан.

● *Айыуға аҡыл өйрәткән — таяҡ, йүнһеҙгә аҡыл өйрәткән — һабаҡ.* Мәҡәл.

**ҺАБАҠЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **һабаҡлау.** *Һабаҡланған энә.*

**ҺАБАҠЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **һабаҡлау.** *Энәне һабаҡлатыу.*

**ҺАБАҠЛАУ** *ҡ.* Епкә кейҙереү, епле итеү. *Энә һабаҡлау.*

**ҺАБАҠЛЫ** *с.* **1.** Һабағы[1] булған. *Күп һабаҡлы ҡамыш.*

**2.** Еп үткәрелгән, һабаҡланған. *Һабаҡлы энә.*

**ҺАБАҠТАУ** *и. этн.* Ҡашмау түбәһенән төшөп торған мәрйенле ептәр. *Ҡашмау ғына кейҙем башыма, һабаҡтауы төштө ҡашыма* (Сенләүҙән).

**ҺАБАҠТАШ** *и.* Бергә уҡыған, бергә һабаҡ[2] алған иптәш. *[Гөлгөл:] Беҙ .. бер мәктәптә уҡыған һабаҡташтар бит.* Ғ. Әхмәтшин.

**ҺАБАЛАУ** *ҡ. ҡар.* **абалау.**

**ҺАБАН** *и.* **1.** Ер һөрә торған ауыл хужалығы ҡоралы. *Бер төрәнле һабан. Күп төрәнле һабан. Һабан һөрөү.* ■ *Малайҙар һабанды йә уғата батырып ебәрә. Былай ҙа барып сыҡмай, һуңынан һабанды нисек кәрәк килештереп, ерҙе телгеләргә тотона.* Ж. Кейекбаев. *Баҫыуға китер халыҡ һуҡа, һабан дуңғырлатып, ер һөрөрҙәр унда аттар тирләтеп.* Ш. Бабич. **Ағас һабан** төрәне меиэн шырты ғына тимерҙән, ҡалған өлөштәре ағастан яһалған боронғо һабан. **Ал төрәнле һабан** алдан кәҫтең ҡыртышын әйләндереп, бураҙна төбөнә һалып бара торған бәләкәй төрәне булған һабан.

**2.** Ер һөрөү эше. *Көҙгө һабан. Яҙғы һабан. Һабан аты. Һабан ваҡыты. Һабанға төшөү.* ■ *Бөгөн туҡтауһыҙ ямғыр яуа. Көҙгө һабан һөрөргә сыҡҡан кешеләр күшегешеп күптән үк ауылға ҡайтып бөттөләр.* Т. Йәнәби.

♦ **Һабан ашлығы** *ҡар.* **ашлыҡ. Һабан һыуы** яҙғы сәсеүҙе бөтөрөп ҡайтып килгән кешеләрҙе һыу һибеп ҡаршы алып, күмәкләшеп һыу һибешеү йолаһы (ямғыр булһын, иген уңһын тигән теләкте белдерә). *Урамдарҙы урап йөрөй: — Һабан һыуы! Һабан һыуы! Игенсенең был ораны .. Тыҡрыҡтарҙа күнәк тотоп, йәш-елкенсәк һаҡта тора, буш үткәрмәй берәүҙе лә — аңғармаҫтан ҡойондора.* Р. Бикбаев.

**ҺАБАНДАШ** *и.* Бергәләшеп һабан һөргән кеше. *Быйыл беҙ күршеләр менән һабандаш булдыҡ. Беҙҙең — бер ат, уларҙың — өс ат.* М. Ғафури.

**ҺАБАНСЫ** *и.* Һабан менән ер һөрөүсе. *Ҡыр күмелә күмәк эш менән: һабансылар йыры, тракторҙар гөрөлдәүе баҫыу өҫтөндә.* Ғ. Сәләм.

**ҺАБАНТУЙ** *и.* Яҙғы сәсеү эштәре тамамланғас үткәрелә торған традицион милли байрам. *Һабантуйға барыу. Һабантуй үткәреү.* ■ *[Аҫылгужа:] Ат сабышы булмағас, һабантуй буламы ни ул!* Ә. Вәли. *Ул [Юлдыбай] көслө булды... Яҙғы һабантуйҙарында көрәштә үҙ тиңдәштәрен генә түгел, хатта үҙенән өлкәндәрҙе лә йыш ҡына күтәреп һуға торған булды.* З. Биишева.

**ҺАБАУ**[1] *ҡ.* Сыбыҡ менән йөн тетеү. *Йөн һабау.*

**ҺАБАУ**[2] *и. ҡар.* **һабағыс.**

**ҺАБЫН** [*ғәр.*] *и.* Йыуыныу, кер йыуыу өсөн зәһәр һелтелә майҙы ҡайнатып яһаған матдә. *Кер һабыны. Бит һабыны. Еҫле һабын. Һабын күперегә. Һабын һауыты. Һабын заводы. Һабын ҡайнатыу. Һабын һөртөү.* ■ *Иҫәнбирҙин ике таҫтамал, һабын алып сыҡты.* Ә. Вәли. *Бәтиҙә түбығынан һыуға ингән дә, еҫле һабынды күпертеп, битен йыуа.* Ш. Янбаев. **Йопар** (*йәки* **күҙ**) **һабыны** еҫле һабын.

♦ **Кәкүк һабыны** *шул уҡ* **һабын сәскәһе** (*ҡар.* **сәскә**).

● *Һабын ҡара булһа ла аҡ йыуа.* Әйтем.

**ҺАБЫНЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **һабынлау.** *Һабынланған кер.*

**ҺАБЫНЛАУ** *ҡ.* Һабын һөртөү, һабынлы итеү. *Ҡулды һабынлап йыуыу.* ■ *Егет хандың башын һабынлай ҙа, таҡыр итеп сәсен ала, ти.* Б. Вәлит.

**ҺАБЫНЛЫ** *с.* Һабыны булған, һабынланған. *Һабынлы һыу.*

**ҺАБЫР** *с. диал. ҡар.* **сабыр** 2. *Һабыр кеше. Һабыр булыу.*

**ҺАБЫУ**[1] (һап*ғ*) *ҡ.* **1.** Яңы баш ялғау (аяҡ кейеменә). *Итеккә баш һабыу. Һапҡан итек.* ■ *Мин китер ваҡыт еткәс, Ғәлимә әбей ойоҡҡа баш һабып бирҙе.* М. Ғафури.

**2.** Эләгеү, йәбешеү. *Һабып барыу.*

**ҺАБЫУ**[2] *и.* Аяҡ кейеменә яңыртып ялғаған баш.

**ҺАБЫШТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** *йөкм. ҡар.* **һабышыу.** *Ауырыуға һабыштырыу. Һарыға һабыштырыу.*

**2.** Нимәнеңдер мәғәнәһен икенсегә бороу. *Көлкөгә һабыштырыу. Ысынға һабыштырыу.* ■ *[Вахап:] Уйынға һабыштырмағыҙ әле, ҡыҙҙар, әйтегеҙ, кем Ҡарлуғас?.. Уйынсалап торор ваҡыт түгел.* Б. Бикбай.

**ҺАБЫШЫУ** *ҡ.* **1.** Төрлө ауырыу һ. б. ауыр бер хәлгә дусар булыу. *Ауырыуға һабышыу. Сиргә һабышыу.* ■ *[Балтасы — председателгә:] .. Һин үҙенең яратҡан эшенән айырылғаны бирле Арслан ҡарттың һарыға һабышып барғанын да күрергә теейешһең.* З. Биишева. *Килен бойоҡҡан да бойоҡҡан, һарыға һабышҡан, ти* (Әкиәттән).

**2.** Ниндәйҙер бер ғәҙәт, шөғөл, ҡылыҡҡа ныҡ бирелеп китеү. *Тәмәке тартыуға һабышыу.* ■ *Тик уңмаҙы малайҙар: эскегә һабыштылар, бисә-сәсә менән сыуалдылар..* Б. Бикбай.

**ҺАҒА** *и. ҡар.* **һаҡа.**

**ҺАҒАЙТЫУ** *ҡ.* **1.** Яҡшыраҡ ишетеү өсөн иғтибарҙы ныҡ туплап, һаҡ булыу. *Ҡолаҡты һағайтыу.* ■ *..Һуҙҙәр шунда уҡ эш тураһында башлағас, [Тимер] ҡолағын һағайтты.* Б. Бикбай.

**2.** Һаҡ булырға иғтибарҙы йүнәлттереү. *Кешене һағайтыу.* ■ *[Сәләх:] Иң элек ул [Мәй-*

*сәрә әбей], бөтәбеҙҙе лә һағайтыр өсөнмө икән, залға оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо.* С. Агиш.

**ҺАҒАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Ниҙелер яҡшыраҡ ишетеү өсөн диҡҡәтте, иғтибарҙы йыйыу. *Ныҡ һағайыу. Һағайып тыңлау.* ■ *Эт ҡапыл туҡтаны. Һағайып, бер алға, бер артҡа ҡараны.* Я. Хамматов.

**2.** Ниҙеңдер шикләнеп, уға иғтибарҙы арттырыу; һаҡ булыу. *Икәү-ара серләшеп ултырғанда, Шүлгәндең һытыҡ йөҙөн күргәнгә һомай унан һағайған.* «Урал батыр».

**ҺАҒАЙЫУЛЫ** *с.* Һаҡ, һиҙгер. *Шәл бөркәнеп ҡапҡанан сыҡҡан Гөлмәҙинә тирә-яҡҡа һағайыулы ҡараш ташланы.* Я. Хамматов.

**ҺАҒАЙЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **һағайыу.** *Һағайышып ултырыу.* ■ *Эше бөткәс, һағайышып ҡалған десантсыларҙың һораулы ҡарашына ул [Таня:] — Госпиталгә ебәрәһе ине лә бит...— тип бышылданы.* Ә. Хәкимов. *Ниңә улар [ҡылғандар] моңайышып, һағайышып ҡалғандар.* Р. Ғарипов.

**ҺАҒАҠ**[1] *и.* **1.** Балта оңғоһоноң артындағы сөй. *Ҡара балта .. һағаһынан төйҙәһенәсә.. сирәмгә гөрһөлдәп батты.* Й. Солтанов.

**2.** Балта йөҙөнөң артҡы өлөшө. *Балтаның һағағы менән сабыу.*

**ҺАҒАҠ**[2] *с.* Ағастың иң аҫҡы ботағы. *[Тандыса] атын һағаҡ ботаҡҡа теҙгененән тартып бәйләй.* «Ҡуңыр буға».

**ҺАҒАЛАНЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **һағайыу 1.**

**ҺАҒАЛАУ** *ҡ.* **1.** Осратыу, тотоу, фаш итеү һ. б. маҡсатта аҫтыртын күҙәтеү. *Һағалап йөрөү. Һағалап тороу.* ■ *Ул [бабай] Арыҫланғәленең берәр бушағанырак ваҡытын һағалабыраҡ тороп, һүҙгә башланы.* Ғ. Дәүләтшин. *[Һәүбән — ҡыҙға:] Һине һағалап йөрөнөм ай тыуғандарын көтөп.* «Аҡбуҙат». *Аҡйелек шул күл буйында йәшенеп кенә йылҡыларҙың һыулауға төшкәнен һағалап ятҡан* (Әкиәттән).

**2.** Һаҡлап, ҡурсып, күҙәтеп, ҡарап йөрөү; һағауыллау. *[Әбей:] Шунда үҙебеҙҙең бала-саға артынан, ҡотобоҙ осоп, шуларҙы һағалап, ... әйәреп йөрөйбөҙ инде.* Һ. Дәүләтшина. *Ялбыр йөнлө Алабай йорт-ерҙәрҙе һағалай.* Ғ. Амантай.

**ҺАҒАЛДЫРЫҠ** *и.* **1.** Йүгәндең тамаҡ аҫтынан бәйләй торған бауы. *Ауыҙлыҡты ҡаптырҙылар. Айғыр уны сығарырға тырыша. Һағалдырыҡ айыл менән ныҡытылған, ыҫҡынырға самаһы юҡ.* С. Агиш.

**2.** Баш кейемен йәки ҡушъяулыҡты эйәк аҫтынан эләктерә торған таҫма. *Ҡушъяулыҡтың һағалдырығын тәңкә баҫып мәрйен тартып матурлау.* ■ *[Ҡатындың] түшендә муйынса әмәйлек. Тәңкә баҫып эшләнгән һағалдырыҡ. Артында арҡалыҡ.* К. Мәргән.

**ҺАҒАЛДЫРЫҠЛАУ** *ҡ.* Һағалдырыҡ менән эләктереү. *Йүгәнде һағалдырыҡлау.* ■ *Ҡыҙҙар баштарындағы киң яулыҡтарын һағалдырыҡлап төйнәгәндәр.* Ш. Шәһәр.

**ҺАҒАРҒЫ** *и. диал.* Төп йорт. *Малды һағарғыға әйҙәү.*

**ҺАҒАУЫЛ** *и.* Һағалап, һаҡлап торған күҙәтсе; һаҡсы. *Боронғо башҡорттар.. йәйләү әйләнәһендә ҡоралды һағауылдар тотҡан.* Ғ. Ибраһимов.

**ҺАҒАУЫЛЛАУ** *ҡ.* **1.** Иғтибар менән күҙәтеү; аңдыу. *Һағауыллап йөрөү. Һағауыллап тороу.* ■ *Һағауыллап торған ҡоралайҙар мине күрмәһә лә, һиҙенде булһа кәрәк, ҡайһылары тертләп, урындарынан ҡуҙғалып ҡуйҙы.* С. Кулибай.

**2.** Күҙәтеп һаҡлау; ҡарауыллау. *«Ауылды яҡшы һағауыллағыҙ, ҡустылар!» — тип ҡыҫҡырҙыҡ беҙ.* С. Кулибай.

**ҺАҒЫҘ** *и.* Сәйнәү өсөн ҡулланылған һуҙылып торған үҙле матдә. *Бер сәйнәм һағыҙ. Һағыҙ ҡайнатыу. Һағыҙ сәйнәү.* ■ *Нәсимә шартлата-шартлата һағыҙ сәйнәй, үҙе һөйләй.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡарағас һағыҙы** ҡарағастың сайырынан алынған һағыҙ. **Ҡара һағыҙ** ҡайын туҙынан махсус ысул менән ҡайнатҡан һағыҙ.

**ҺАҒЫҘАҠ** *и.* **1.** Яры ҡанатлылар ғаиләһенә ҡараған буй-буй һары һыҙатлы ҡара төҫтәге саға торған бөжәк. *Һары һағыҙаҡ.* ■ *Ҡыҙҙар йыуа йыйырға таралдылар. Әлеге һағыҙаҡтар бында ла арттан ҡалмай, маҙаны ҡилтерәләр ине.* Б. Бикбай. *Ҡыуыш имән. .. Ҡыуышында оялаған һағыҙаҡ.* М. Уразаев.

**2.** *ҡусм.* Бәйләнсек кешегә ҡарата әйтелә. *Уның үҙен [егетте] һағыҙаҡ тип тә әйтерлек түгел: ул кешегә ни яҡтан яҡын килергә белә, йән биҙҙерерлек ҡыланмай.* Ә. Гәрәев.

● *Ете йыллыҡ һағыҙаҡ саҡһа, әҙәм үлтерер.* Әйтем. *Һағыҙаҡ күп ерҙә себен юҡ була.* Әйтем.

**ҺАҒЫҘАҠЛАНЫУ** *ҡ. һөйл.* Бәйләнсекләнеү. *Һағыҙаҡланып йөрөү.*

**ҺАҒЫМ** *и.* **1.** Ер өҫтөнән земберләп күтәрелгән эҫе һауа; монар, сағым. *Елбер-елбер зәңгәр яулыҡмы ни яландарҙың зәңгәр һағымы.* Р. Бикбаев.

**2.** *ҡар.* **сағым**[1] 2.

**ҺАҒЫМЛАНЫУ** *ҡ.* Һағым һымаҡ булыу. *Күкле-зәңгәрле йәйғор таҫмаһы һағымланып уйнай.* Ғ. Ғүмәр.

**ҺАҒЫМЛАУ** *ҡ.* Һағым һымаҡ булып тороу (һауаға ҡарата). *Баҫыу өҫтәре һағымлап тора.*

**ҺАҒЫНДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Һағыныу тойғоһо уятыу. *Һағындырып ҡына килеү.* ■ *Шахрутдин дуҫ! Ҡайтҡас ҡына белдем, һағындырыу булған иҫәбең.* М. Кәрим.

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **һағыныу.** *Ҡайтҡы килә, һағындыра, түҙеп булмай* (Бәйеттән).

**ҺАҒЫНЫУ** *ҡ.* Осрашҡы, күрге килеүҙән зар булыу. *Һағынып көтөү. Һағынып ҡайтыу.* ■ *Һағынам үҙен! Күргем килә!.. Таң алдында өҙөлөп-өҙөлөп һағынам бит мин уны.* Б. Ишемғол.

**ҺАҒЫНЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **һағыныу.** *Өҙөлөп һағынышҡан йәштәр ҡыуаныша, көлөшә.* З. Биишева.

**ҺАҒЫУ** (һаҡ*ғ*) *ҡ.* **1.** Ҡайҙандыр ҡолап, төшөп йәки ағып барған ерҙән эләгеп, төкөлөп туҡтау. *Ҡырсынға һаҡҡан бүрәнә.* ■ *Һаҡҡан ағас ҡурҡыныс, ыҫҡынып өҫтөнә ҡолауы бар.*

**2.** Өҫтән һалынып төшөп тороу. *Армыт-армыт һағып тора ҡарт ҡайындың суҡтары.* С. Кулибай.

**ҺАҒЫШ** *и.* Һағыныу тойғоһо. *Йырҙарымда тормошомдоң шатлығы, һағыштары.* А. Игебаев. *Серҙәрем күп, серҙәшем юҡ, эстәрем һағыш ҡына* (Халыҡ йырынан). **Һары һағыш** бик көслө һағыш.

**ҺАҒЫШЛАНЫУ** *к.* Һағыш тойғоһон кисереү. *Алмаш-тилмәш тауыш бирешәләр һағышланған төнгө сак-суктар.* Х. Ғәбитов.

**ҺАҒЫШЛЫ** *с.* Һағыш тойғоһона тулы; моңһоу, бойоҡ. *Һағышлы күҙҙәр.* ■ *Икәүләп тыңлап торҙоҡ. Бигерәк һағышлы, ғәжәп моңло, күңел төбөнән урғылып сыҡҡан моң ине был.* Н. Мусин.

**ҺАҘ** *и.* **1.** Аҫтан һыу йыйылып ятҡан батҡаҡ ер. *Һаҙ үләне. Һаҙға батыу.* ■ *Мин тал төбөнә баҫып, короға сығырға теләһәм, тағы аяктар һаҙға батты.* Д. Юлтый.

**2.** *диал.* Шырлыҡ.

♦ **Һаҙ ҡондоҙо** *кар.* **ҡондоҙ. Һаҙ өкөһө** *кар.* **өкө.**

**ҺАҘА** *и. диал.* Һаҙлыҡ.

**ҺАҘАҒАЙ** *и.* **1.** Космостан атмосфераға ингән өлөшсәләр ағымы хәрәкәте менән барлыҡҡа килеп, атмосфера өҫтөн яҡтыртып ебәрә торған яҡтылыҡ нурҙары. *Һаҙағай уйнау. Һаҙағай ялтырау.* ■ *Тиҙҙән ерҙе кап-кара төн пәрҙәһе каплап алды, инде бер ни ҙә күренмәй ине. Һаҙағайҙар өҙлөкһөҙ ялтыраны.* К. Кинйәбулатова.

**2.** *диал. кар.* **ялағай** 1.

**ҺАҘАҒАН**[1] *с.* **1.** Оҙаҡ йәшәгән. *Һаҙаған кеше.*

**2.** Өйләнмәйенсә йәки кейәүгә сыҡмайынса оҙаҡ йәшәгән. *Һаҙаған егет. Һаҙаған ҡыҙ.*

♦ **Һаҙаған айғыр** 10—15 йыл өйөр башы булып йөрөгән айғыр. **Һаҙаған убыр** бик оҙаҡ йәшәгән һәм төрлө ҡиәфәткә инеп кешеләргә зыян килтерә торған мифик зат (әбей затынан).

**ҺАҘАҒАН**[2] *и. диал.* һаҙағай.

**ҺАҘАҒАН**[3]: **һаҙаған китәйем** (*йәки* **булайым**) кемгәлер кеселеклек менән өндәшкәндә әйтелә. *[Юлдыкай:] Беркүк һөйлә, еңгә, һаҙағаң китәйем.* Х. Ғәбитов.

**ҺАҘАЙ** [*фарс.*] *и. иҫк.* Тейешле бүләк; әжер. *[Күсәк:] «Биш йыл буйы хакһыҙ куй көткән өсөн теге ҡыҙҙың һаҙайын бирең»,— тине.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ҺАҘАҠ** *и.* **1.** Уҡ һалып йөрөтә торған һауыт. *Кун һаҙаҡ. Һаҙаҡ яһау.* ■ *Угатар батыр һаҙағынан йәһәт кенә уҡ ала һалып, төбәп атып ебәргән.* З. Биишева. *Егет .. карттың һаҙағынан бер уҡ алып, йәйәһен кереп, керешен тарта башлаған* (Әкиәттән).

**2.** Йәйә, уҡ, уҡ башағы һымаҡ ҡоралдар һалып йөрөтә торған һауыт. *Һаҙаҡтарҙы күҙғатып карайҙар, бер генә кеше кутәрерлек түгел. Яны алты таяҡка етә, ти, уғы биш таяҡка етә, ти, уғының башағы алтындан, ти, ҡанаты көмөштән, ти* (Әкиәттән).

**3.** Йөн йәбештереп осона үткер башаҡ ҡуйылған һыҙма уҡ. *Алмас башлы һаҙаҡ. Һаҙаҡ башы. Һаҙаҡ яһау. Һаҙаҡ атыу.* ■ *Атанан алтау тыуһа ине .. Һаҙаҡ атып дошмандың алғыр яуын баҫһа ине.* М. Буранғолов. *Һаҙаҡ теймәҫ Нәркәсте атып алған Һәүбән мин..* «Аҡбуҙат». *Һаҙаҡ менән атып та алыр инем. Көнһылыукай ыласын кош түгел* (Халыҡ йырынан).

**4.** Тимерҙән, мөгөҙҙән, һөйәктән һ. б. яһалған уҡ башағының башына ҡуйыла торған ырғаҡлы осло нәмә. *Алмас һаҙаҡ. Тимер һаҙаҡ. Һаҙаҡ һуғыу.* ■ *Патриот батырҙар .. һәр ерҙә — урманда уҡ юнып, аласыҡта һаҙаҡ һуғып, тана-торпо һуйып, ит ҡаклап, яуға әҙерләнгән.* Ә. Усманов. *Һаҙаҡ һуғып ҡыҙаштар Урал буйын шаңғыртты.* «Батырша». *Тимерҡотло менән Тамъян арыҫландың тәнендә-яраһында һаҙаҡ ярсығы барын күрә.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

♦ **Йәйә һаҙаҡ** *кар.* **ҡорман**[1].

**ҺАҘАҠА** *и. кар.* **саҙаҡа.**

**ҺАҘАМЫҠ** *и.* Һаҙға тартым батҡыл ер, һаҙмат ер; һаҙамыт, һаҙламыҡ. *Һаҙамыҡҡа төшөү.* ■ *Һаҙамыкта түңгәклек, камышлыҡ һәм күсәнлек.* С. Ҡудаш.

**ҺАҘАМЫТ** *и. кар.* **һаҙамыҡ.**

**ҺАҘАН** *и.* **1.** Эре һарғылт тәңкәле, ҡылсыҡлы сөсө һыу балығы. *Һаҙан балығы. Һаҙан үрсетеү.*

**2. Һаҙандар** *зоол.* Ҡорман балыҡ, вобла, һаҙан һымаҡ сөсө һыу балыҡтары ғаиләһенең атамаһы.

**ҺАҘАНАҠ** *и.* Арсалар ғаиләһенә ҡараған һыулы ерҙә үҫкән оҙонса япраҡлы, аҡ өйкөм сәскәле мәңге йәшел ваҡ ҡыуаҡ. *Һаҙанаҡ еҫе.*

**ҺАҘЛАМЫҠ** *и. кар.* **һаҙамыҡ.**

**ҺАҘЛАНЫУ** *к.* Һаҙға әйләнеү. *Һаҙланған ер.*

**ҺАҘЛАУ** *и. диал.* Һаҙамыҡ.

**ҺАҘЛАУЫҠ** *и.* Һаҙлы урын, һаҙлы ер. *Сылтырап ағыр көмөш тау һыуҙары һаҙлауыҡтар яһап болонда.* Х. Кунаҡбай.

**ҺАҘЛЫҠ** *и.* **1.** Һаҙлы ер, һаҙ. *Яҡында ғына, һаҙлыҡтағы ерек араһында, тартай тартылдай.* Б. Бикбай. *Һандуғастар һайрай ай һаҙлыҡта, һаҙлыҡта ла түгел, таллыҡта* (Халыҡ йырынан).

**2.** Батып быҫраҡ булып ятҡан ер; батҡаҡлыҡ. *Ямғыр туҡтаны. Ләкин .. юл тотош һаҙлыҡҡа әүерелде.* Б. Дим.

**3.** *диал.* Шырлыҡ.

**ҺАҘМАТ** *с.* Һаҙға тартым; батҡаҡ. *Һаҙмат ер.* ■ *Ваһап ул ерҙе, һаҙматыраҡ тип, һөрмәне.* Ж. Кейекбаев.

**ҺАҘЫРАН** *и. диал.* Һаҙлыҡ.

**ҺАЖ** *окш.* Шыйыҡлыҡ көслө ҡайнап барғанда йәки механизм көслө хәрәкәт иткәндә сыҡҡан тауышҡа оҡшатып әйтелгән һүҙ. *Һаж итеү. Һаж килеү.*

**ҺАЖДӘ** *с. диал.* Уҫал, яман.

**ҺАЖЛАТЫУ** *к.* Һаж иттереү, һаж иткән тауыш сығартыу.

**ҺАЖЛАУ** *к.* Һаж иткән тауыш сығарыу. *Әүжән яғынан һажлап машина ҡайтып килде.* С. Ғәбиҙуллин.

**ҺАЗАРАН** [*фарс.*] *р. иҫк. кит.* Мең тапкыр. *Һазаран шөкөр итергә гәрсә бар дәртем минең.* М. Өмөтбаев.

**ҺАЙ**[1] *с.* **1.** Өҫкө кимәлдән аҫҡы кимәлгә тиклемге араһы бәләкәй, тәрән түгел (һыуға, соҡорға ҡарата). *Һай диңгеҙ. Һай соҡор. Һыуҙың һай урыны. // Һай ҡаҙыу. Һай һөрөлгән ер.* ■ *Канауҙың ҡайһы ере тәрән, ҡайһы ере һай.* Д. Юлтый.

**2.** *кусм.* Нигеҙе йомшаҡ; әҙ, төпһөҙ. *Уның белеме һай. // Һай белеү.* ■ *Мостафа мулла бик бай икән, .. бай булһа ла аҡылы һай икән* (Халыҡ йырынан).

♦ **Һай йөҙөү** ниндәйҙер бер өлкәлә әҙ, насар белемле булыу, өҫтән генә фекер йөрөтөү.

● *Һай йылғаның балығы ваҡ булыр.* Мәҡәл.

**ҺАЙ²** *ымл.* **1.** Нимәгәлер һокланғанда әйтелә. *Һай матур! Һай афарин!* ■ *Һай, күңелле, дуҫтар, был айҙа, күҙ сағылтып ята туғай ҙа!* Ғ. Амантай.

**2.** Нимәгәлер үкенгәндә әйтелә. *Һай, бар ине беҙҙең ерҙәрҙә һунарҙың шәп саҡтары.* М. Тажи. *Һай, ғүмерҙәр үтте китте, кайҙа китте ул заман?* Ш. Бабич.

**3.** Ҡыҙғанып әсенгәндә әйтелә. *Һай, Зөлхизә, Зөлхизә... Бер ни ҙә аңламайһың, бер ни ҙә күрмәйһең, балаҡай.* З. Биишева.

**4.** Ризаһыҙлыҡты белдереп шелтәләгәндә әйтелә. *[Әмирханов:] Һай, ахмаҡ, был ниндәй оятһыҙлыҡ!* С. Агиш.

**5.** (*йәки* **Һай кем**) Йырҙарҙа тойғоно көсәйтеү, көй күтәреү өсөн әйтелә. *Һай!.. Саң-саң итә Ирәндек бөркөтө* (Халыҡ йырынан). *Һай, әйелмәй, бөгөлмәй, матур баҫа түгелме* (Халыҡ йырынан). *Талмай микән уның бәләкәйҙәре, һай кем, сайҡағанда* (Халыҡ йырынан).

**ҺАЙҒАҠ¹** *и. диал.* **1.** *кар.* **һайғау²**.

**2.** Түбә таҡтаһы. *Һайғағы һирәк һалынған.*

**3.** Өрлөк. *Һайғағы бейек.*

**ҺАЙҒАҠ²** *с. диал. кар.* **һай¹** 1.

**ҺАЙҒАЛАУ** *к. кар.* **һайғау¹**.

**ҺАЙҒАУ¹** *к.* Төҙ, оҙон ағастарҙы һарай түбәһенә теҙеп түшәү.

**ҺАЙҒАУ²** *и.* **1.** Төҙ, оҙон, нәҙек ағас. *Һайғау ҡырҡыу. Һайғау түшәү.* ■ *Йылға аша ике һайғауҙан ғына баҫма һалынған, ул баҫҡан һайын һығылып тора.* Н. Мусин.

**2.** Төҙ, оҙон ағастарҙан йәйелгән түшәм. *[Нурулла] аҙбарының һайғауы өҫтөнән мул иттереп бесән ташланы.* С. Ҡудаш.

♦ **Һайғауы һирәк** башҡортса әҙ-мәҙ аңлаған икенсе милләт кешеһенә ҡарата әйтелә.

**ҺАЙҘАҠ** *и.* Тоҡом өсөн һайлап алып, айырым йөрөтөлгән йылҡы малы. *Йылҡы малын тибенләтеү Башҡортостан шарттарында һыналған инде ул. Уңайлы урын булһа, һайҙаҡтарҙы сығарырға мөмкин.* Я. Вәлиев. *Яҙ кимәлкәйҙәре еттениһә, уйнаҡлай байҙың һайҙағы* (Халыҡ йырынан).

**ҺАЙҘАНЫУ** *к. диал.* Һаташыу.

**ҺАЙЛАМ** *с.* Иң шәп, иң яҡшы. *[Әбйәлил:] Һин миңә иң яҡшы бер һайлам ат бир* (Әкиәттән). *Ыласын, бөркөт үҫкән ай Уралда [Ҡаһым түрә] сал бөркөттәй һайлам ир ине* (Халыҡ йырынан).

**ҺАЙЛАНДЫҠ** *с.* **1.** Һайлап алынған; яҡшы, һайлам. *Мәкәлдәрҙең һайландыҡ еңел һүҙҙәрҙән ҡыҫҡа, аңлайышлы итеп төҙөлөүе .. тиҙ оторға һәм хәтерҙә нык һаҡларға ярҙам итә.* Ғ. Амантай.

**2.** Яҡшыһын һайлап алғандан ҡалған, ҡалдыҡ. *Һайландыҡ картуф. // Һайландыҡтары ҡалған.*

**ҺАЙЛАНМА** *с.* Баҫтырыу өсөн һайлап алынған. *Һайланма әҫәрҙәр.*

**ҺАЙЛАНМЫШ¹** *с.* Ниндәйҙер талап менән һайлап алынған. *Бер ваҡыт Сидор Аристов сапҡындар ебәреп, бүтән һайланмыш башҡорттарҙы саҡыртты.* И. Акманов.

**ҺАЙЛАНМЫШ²** *и.* Урынға, етәкселеккә рәсми һайлап ҡуйылған кеше. *[Казыйҙар] һайланмыштар менән һүҙ беркетеп, .. ауыл халҡын төрлө яклап талай торған булған* (Хикәйәттән).

**ҺАЙЛАНСЫҠ** *с.* Һайланырға яратыусан; талымлы. *Һайлансыҡ кеше. Һайлансыҡ булыу.*

**ҺАЙЛАНЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **һайлау¹**. *Һайланып алыныу.*

**2.** Нимәнеңдер яҡшырағын һайлап эҙләнеү. *Һайланып, наҙланып йөрөмә сәскәләр араһында.* Н. Нәжми.

● *Һайланған һаҙға, һөрөнгән таҙға.* Әйтем.

**ҺАЙЛАНЫШ** *и. биол.* Нәҫел-тоҡомдон һайланып үрсеше.

♦ **Тәбиғи һайланыш** йәнле тәбиғәттә үҙгәреп торған тормош шарттарына нығырак яраҡлашҡан организмдарҙың һаҡланып ҡалып артабан үҫеш процесы. **Яһалма һайланыш** йорт хайуан тоҡомдарын, культуралы үҫемлектәр сорттарын яҡшыртыу һәм яңыларын барлыҡҡа килтереү һәм кешенең талабын нығыраҡ ҡәнәғәтләндереү маҡсатында хайуан һәм үҫемлек формаларының кеше тарафынан һайланып алыныуы.

**ҺАЙЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **һайлау¹**. *Кемдең кем икәнен белгең килһә, баҙарға сығарып ат һайлат, тигән боронғолар.* Й. Солтанов.

**ҺАЙЛАУ¹** *к.* **1.** Күп нәмә, күмәк кеше араһынан үҙеңә ярағанын айырып билдәләү. *Ат һайлау. Урын һайлау. Һайлап алыу.* ■ *Кейеҙбай үҙенә оҡшаған бер ҡып-ҡыҙыл алманы һайлап ала* (Әкиәттән).

**2.** Берәй эшкә, вазифаға ҡуйыр өсөн күмәкләп тауыш биреү юлы менән кемделер айырып билдәләү. *Депутат итеп һайлау. Вәкил итеп һайлау. Председатель итеп һайлау. Директорҙы һайлап ҡуйыу.*

● *Ауыҙы ҡыйыш булһа ла, байҙың ҡыҙы ир һайлар.* Әйтем.

**ҺАЙЛАУ²** *и.* Берәй эшкә, вазифаға ҡуйыр өсөн күмәкләп тауыш биреү юлы менән кемделер айырып билдәләү эше. *Һайлауҙа ҡатнашыу. Һайлау үткәреү. Һайлауға әҙерләнеү.* ■ *Һайлау кампанияһының иң яуаплы осоро — депутатлыҡҡа кандидаттар күрһәтеү.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 29 ғинуар.

**ҺАЙЛАУСЫ** *и.* Һайлауҙа² ҡатнашҡан, ҡатнашырға хоҡуғы булған кеше. *Һайлаусылар йыйылышы.*

**ҺАЙЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **һайлау¹**.

**ҺАЙЛЫҠ** *и.* Һыуҙың һай урыны. *Йырғанаҡ .. һайыға-һайыға бара ла Келәш һәм Ҡараякуп һырттары араһындағы киң үҙән һайлығына килеп бөтөнләй юғала.* С. Ҡудаш.

**ҺАЙМАН** *и.* Һауыт-һаба. *Түрҙә һаймандар ҡуйылған.*

**ҺАЙПАҠ** *и. диал.* Тула ойоҡ.

**ҺАЙРАР:** **һайрар ҡош** һайрай торған ҡош. *Айлы кистәрең дә һаман иҫтәремдә һайрар ҡоштарыңдың моңдары.* Н. Иҙелбай. *[Таштуғайҙың] һаҙҙарында һайрар ҡоштары юҡ, моңло ҡошкайҙары ҡаҙ икән* (Халыҡ йырынан).

**ҺАЙРАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **һайрау.** *Һары һандуғас балаһын ҡулдарымда һайратам* (Халыҡ йырынан).

**ҺАЙРАУ** *к.* **1.** Төрлө матур, моңло тауыш менән көйләү (ҡошҡа ҡарата). *Һандуғас бик матур һайрай.* ■ *Таң һайын һандуғастары талдарҙа һайрап тора.* Р. Ниғмәти.

**2.** *күсм.* Алдау, арбау ниәте менән матур итеп, килештереп һөйләү. *Ҡунаҡҡол һайрарға кереш кәйне лә Хәбибуллин .. уны тиҙ туҡтатты.* Х. Ғиләжев.

**ҺАЙРАШЫУ** *ҡ.* **1.** *урт. ҡар.* **һайрау.** *Ҡоштар һайраша.*

**2.** *күсм.* Күңелле итеп, кинәнеп һөйләшеү. *[Гөлзәбирә:] Ярар, балалар, үҙегеҙ генә һайрашып ултырығыҙ. Минең эшем дә бар.* Р. Ниғмәти.

● *Һабанда һайрашмаһаң, ырҙында ыңғырашырһың.* Әйтем.

**ҺАЙТ 1.** *ымл.* Кемдеңдер ҡасып барғанын күреп ҡалғанда әйтелә. *Һайт, ҡайҙа йүгерҙең!*

**2.** *ҡыу.* Һөрәнләп мал ҡыуғанда әйтелә. *[Айбулат:] Һайт, ҡара юрға! Асатай, көтөүҙең башын ҡайыр.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Һайт тигәндә тайт тип тороу** бик кеше ыңғайлы, бик тыңлаулы булыу. *[Ҡарт:] Һин үҙең дә, Ғаббас ҡусты, һайт тигәндә тайт тип, телефон шылтыраған һайын ат әйәрләп районға сапма.* М. Тажи.

**ҺАЙТЛАУ** *ҡ.* Һайт тип ҡысҡырыу. *Һайтлап ҡыуыу.* ■ *Мал артынан һыбай, йәйәү кешеләр туҡтауһыҙ һайтлап, һәүкәләп баралар.* Ш. Шәһәр.

**ҺАЙТЫЛДАУ** *ҡ.* Ҡабат-ҡабат һайт тип ҡысҡырыу. *Һайтылдап мал ҡыуыу.* ■ *Ҡотой, тағы кемдәрҙер һайтылдап мал һуғарыуға тип сыҡтылар.* Т. Хәйбуллин.

**ҺАЙ-ҺАЙТЛАУ** *ҡ.* Һайт, һайт тип һөрән һалып ҡысҡырыу. *Һай-һайтлап ҡыуыу.* ■ *Ғәйни-камал еңгәмдең һай-һайтлап йылҡы ҡыуып төшкәне күренде.* Й. Солтанов. *Көтөүселәр һай-һайтлап, уны [нәҫел бейәһен] башҡа йылҡыларға ҡушалар.* Й. Мостафин.

**ҺАЙ-ҺАУЛАУ** *ҡ.* Һай, һау тип һөрәнләү, ҡысҡырыу. *Көтөүсенең һай-һаулап көтөү ҡыуып килгән тауышы ишетелде.* Я. Вәлиев.

**ҺАЙ-ҺЫУ** *ымл.* Мал-тыуар ҡыуғанда ҡысҡырып әйтелә. *Һай-һыу һалып ҡысҡырыу.*

**ҺАЙҺЫУЛАУ** *ҡ.* Һай-һыу һалып ҡысҡырыу. *Һайһыулап ҡыуыу.* ■ *Зәки .. һайһыулап ҡоланы ҡамсылай.* С. Агиш.

**ҺАЙЫҒАЙЫУ** *ҡ. ҡар.* **һайығыу.**

**ҺАЙЫҒЫУ** (һайыҡ*г*) *ҡ.* Һай [1] (1 мәғ.) булыу, һайға әйләнеү. Йылға һайыға. ■ *Һайыға, тиҙәр, йылғаны йылдар күп үткән һайын.* Р. Ниғмәти. *Үргә барған һайын һыу тарая, һайыға барҙы.* Ф. Лоҡманов.

**ҺАЙЫҠТЫРЫУ** *ҡ.* Һай[1] (1 мәғ.) итеү, һайға әйләндереү. *Һыуҙы һайыҡтырыу.*

**ҺАЙЫЛДАШЫУ** *ҡ.* Һай[2] ҙа һай тип ҡысҡырышыу. *Ауыр кәүҙәләрен еңеләйтеп, һайылдашып бейей башланылар.* Р. Солтангәрәев.

**ҺАЙЫН** *бәйл.* **1.** Урын-ваҡытты, эш-хәрәкәтте белдергән төп һәм эйәлек килештәге һүҙҙәр менән килеп, ниҙеңдер ҡабатланышын белдерә. *Ауыл һайын. Ай һайын. Байрам һайын. Көн һайын. Осраған һайын. Килгән һайын.* ■ *Таштуғайҙың буйы бөгөл-бөгөл, бөгөлдәре һайын аҡ өйрәк* (Халыҡ йырынан).

**2.** Сифат ҡылымдың *ғ*ан формаһы менән килеп, эш-хәрәкәттең йәки берәй хәлдең көсәйә барышын белдерә. *[Ныязғол:] Етәр, тием, .. өндәшмәгән һайын шашаһың!* Һ. Дәүләтшина. *Хәҙер артҡа сиккән һайын ҡурҡыныс.* Д. Юлтый.

♦ **Барған һайын** ваҡыт уҙа килә; һаман. *Барған һайын ел көсәйә.* **Уның һайын** алда әйтелгәнгә ҡаршы нимәнеңдер оторо көсәйеүен, ҡабатланыуын белдерә. *Ҡатындар .. шарҡылдап көлөп ебәрҙе. Ә Ямал уның һайын үҙенекен һөйләй.* М. Тажи. **Ураған** (*йәки* **әйләнгән**) **һайын** һәр ваҡыт; әлдән әле. *Әсәйем әйләнгән һайын һине һорашып ҡына тора.* Б. Бикбай.

● *Ҡапҡан һайын ҡалъя булмай.* Мәҡәл.

**ҺАЙЫРҠАЛАУ** *ҡ. ҡар.* **һайырҡау.**

**ҺАЙЫРҠАУ** *ҡ.* Ҡурсалап ҡарауыллау, һаҡлау.

**ҺАЙЫҪҠАН** *и.* Ҡоҙғондар ғаиләһенә ҡараған оҙон ҡойроҡло ҡара ала ҡош. *Һайыҫҡан ояһы. Һайыҫҡан шыҡырлауы.* ■ *Әлекәй тигәндәре .. муйынын әлмәйтеп ала ла ҡайҙа ултырғанынды һайыҫҡан һымаҡ аңдый ҙа йөрөй.* Т. Хәйбуллин. *Һис туҡтауһыҙ шыҡырыҡлай — шундай ҡош ул һайыҫҡан.* С. Кулибай.

♦ **Ҡом һайыҫҡаны** һыу буйында ҡомда, ҡырсында йәшәгән көсле тауыш менән ҡысҡыра торған ҡыҙыл суҡышлы ҡара ала ҡош. **Урман һайыҫҡаны** *ҡар.* **бараба**[1].

● *Һайыҫҡан ҡыйыҡ башына ҡунһа, ҡайғы килер.* Әйтем.

**ҺЫЙЫТЫУ** *ҡ. ҡар.* **һайыҡтырыу.** *Күлде һайытыу.*

**ҺАЙЫУ** *ҡ.* Һайға әйләнеү, һай булыу; һайығыу.

**ҺАҠ**[1] *с.* **1.** Ҡурҡыныс һ. б. хәлгә иғтибары көслө, һиҙгер, сос. *Һаҡ ҡолаҡ. Һаҡ булыу // Һаҡ йоҡлау. Һаҡ тороу.* ■ *Беҙҙең постар — иң һаҡ күҙәтселәр.* Ғ. Сәләм. *[Мәскәй:] Бөгөн төндә йоҡлаған булып ят, ләкин бик һаҡ бул* (Әкиәттән).

**2.** Абайлап, ҡарап һаҡлыҡ менән эш итеүсән; абай. *Һаҡ кеше. // Һаҡ йөрөү.* ■ *Буре-мағарҙан һаҡ булырға кәрәк.* Һ. Дәүләтшина. *Ғәйзулла бабай яңы сыраҡ тоҡандырып алды ла һаҡ ҡына алға ҡуҙғалды.* Н. Мусин. / Йомшаҡ ҡыланышлы; ипле. *Һаҡ хәрәкәт. // Һаҡ баҫыу. Һаҡ ҡағылыу.* ■ *Кемдер тышҡы ишекте һаҡ ҡына итеп ҡаҡты.* С. Агиш.

**3.** Ҙур иғтибар менән ҡайғыртыусан, аяулы, ҡурсыулы. *Һаҡ мөнәсәбәт. // Улар .. аттарға һаҡ ҡарай, ваҡытында ашата, эсерә.* Б. Бикбай.

**ҺАҠ**[2] *и.* Кем йәки нимәнелер һаҡлау, ҡарауыллау, күҙәтеү өсөн ҡуйылған ҡораллы көс йәки кеше, ҡарауыл. *Һаҡ ҡуйыу. Һаҡ менән йөрөү. Һаҡ менән оҙатыу.* / Нимәнелер ҡарауыллау, һаҡлау хеҙмәте. *Һаҡта тороу. Ил сигендә һаҡта тороу.* ■ *Күҙҙе һаҡлаған күҙ һабағындай беҙ торабыҙ, ил, һинең һағыңда.* М. Хәй. **Ҡарауыл һағы** ғәскәр урынлашҡан ергә ҡуйылған махсус ҡарауыл. **Һаҡ аҫтына алыу** кешене иркенән мәхрүм итеп, ҡарауыллап тороу. **Яу һағы** яуҙа, һуғыш ҡырында дошмандың көтөлмәгән һөжүмен киҫәтеү өсөн ҡуйылған ҡарауыл.

● *Ағаһы барҙың һағы бар.* Әйтем.

**ҺАҠ**[3] *и.* Бик кәрәк саҡта тотонор өсөн йыйып ҡуйылған нәмә.

● *Һаҡлының һағы ятыр, һаҡһыҙҙың башы ҡатыр.* Әйтем.

**ҺАҠ**[1] *и.* Сайыр ағыҙыу өсөн ҡарағайҙы һыҙа торған ҡорал; сайыр бысағы. *Һаҡ тигән эш ҡоралы оҙон йәй буйы уның [сайырсының] ҡулынан төшмәй. .. Һәр ҡарағай һайын һаҡ менән сайыр ағыҙыу улағы* һыҙа. Н. Шәйхулов.

**ҺАҠА** *и.* Ашыҡ һуғыу уйынындағы һуҡҡыс. *Атаһы баланың йәкәл уйынына шәп буласағын күрҙе лә ти, быға алтын һаҡа алып бирҙе, ти. Айыуғолаҡ был һаҡа менән малайҙарҙы элеккенән дә нығыраҡ ота башланы, ти* (Әкиәттән).

◆ **Һаҡа айғыр** *шул уҡ* **һаҙаған айғыр** (*ҡар.* **һаҙаған**[1]). **Һаҡа кеше** үҙаллы, үҙ көсө менән йәшәгән ныҡ кеше.

**ҺАҠАЛ**[1] *и.* Ирҙәрҙең эйәге менән сикәһенә үҫкән йөн. *Һаҡал еткереү.* ■ *Һәүбән: Айыры һаҡал үҫтергән Сәмәр хандыр атайым.* «Аҡбуҙат». **Ата һаҡал** ирен аҫтындағы соҡорға үҫкән өйкөм һаҡал. **Көрәк һаҡал** мул, киң һаҡал. **Кәзә һаҡал** эйәк осонда ғына үҫкән оҙон һаҡал. **Сикә һаҡалы** сикәнән төшөрөп үҫтергән һаҡал. **Сүсәнәк һаҡал** эйәк осонда ғына тырпайып үҫкән осло һаҡал. **Һәрпәк һаҡал** *ҡар.* **сүсәнәк һаҡал.** **Шәлкем һаҡал** нәҙек оҙон һаҡал. / Ҡайһы бер йәнлек, хайуандарҙың эйәк аҫтында һалбырап торған йөнө. *Кәзә һаҡалы.*

◆ **Кәзә һаҡалы** *ҡар.* **кәзә.** **Ҡайҙа барһаң да ҡара һаҡалың артыңдан ҡалмай** кешенең ҡылған насар эше, ҡылығы үҙенән айырылмай тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Мораҙым:] Разведчик итеп алманылар мине.., өҫтөмдән судимость «ун йыл» тигән ҡара һаҡалым артымдан ҡалмай эйәреп йөрөй икән.* Ғ. Әмири. **Һаҡалды һыйпап ҡалыу** һемәйеп буш ҡалыу.

● **Эйәк күрке — һаҡал, һүҙ күрке — мәҡәл.** Әйтем.

**ҺАҠАЛ**[2] *и. этн.* Ҡатын-ҡыҙҙың аҫтан түңәрәгерәк итеп, уртаһына шау тәңкә, ситенә буй-буй мәрйен баҫып яһаған күкрәк биҙәүесе. *Һаҡал тағыу.* ■ *Ҡыҙҙар бейегәндә һаҡалдары, сулпыларының сылтырағаны ишетелеп ҡала.* Ж. Кейекбаев.

**ҺАҠАЛБАЙ** *и.* Ҙур һаҡаллы кеше.

**ҺАҠАЛЛАНЫУ** *ҡ.* Һаҡаллы булыу. *Яҡшы уҡ һаҡаллана башлаған Минһаж .. тирмән күпере өҫтөндә Шакирҙы осратты.* Ғ. Хәйри.

**ҺАҠАЛЛЫ** *с.* Һаҡалы булған, һаҡал үҫтергән. *Һаҡаллы ҡарт.* **Һаҡаллы сабый** *ҡар.* **сабый.**

◆ **Аҡ һаҡаллы ҡарт булыу** *ҡар.* **ҡарт.**

**ҺАҠАЛ-МЫЙЫҠ** *и. йыйн.* Һаҡал һәм мыйыҡ. *Бай Оморҙаҡты танымаған. .. Уны һаҡал-мыйыҡ баҫып бөткән булған* (Әкиәттән).

**ҺАҠАЛСАН** *и. диал.* Эт балығы.

**ҺАҠАЛТА** *и. диал.* Мәрйен.

**ҺАҠАЛТАЙ** *с.* Ҙур һаҡаллы, етек һаҡаллы. *Һаҡалтай кеше.*

**ҺАҠАУ**[1] *с.* Телдәге ҡайһы бер өндәрҙе дөрөҫ, асыҡ әйтә алмаған йәки боҙоп һөйләгән. *Һаҡау бала. Һаҡау булыу. // Һаҡау һөйләү.* ■ *Малай йыр тауышын ишеткәс, үҙенең бәләкәс тауышы, һаҡау теле менән йырға ҡушыла.* Һ. Дәүләтшина.

● *Аҡһаҡ ултырмаҫ, һаҡау тик тормаҫ.* Әйтем.

**ҺАҠАУ**[2] *и.* Тамаҡ аҫты шешеп, танауынан ҡан килтерә торған йоғошло йылҡы ауырыуы. *Һаҡау сыҡҡан.* ■ *[Гөлбикә:] Күрән бейәнең ҡолонона һаҡау булған.* Д. Юлтый.

**ҺАҠАУЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Һаҡау[1] булыу, һаҡауға әйләнеү. *Һаҡауланған кеше.*

**2.** Саҡырған тауышты ҡарлыҡҡан һымаҡ үҙгәреү (кәкүккә ҡарата). *Теле уның [кәкүктең] һаҡаулана, йәмле май айы үҙһа.* С. Кулибай.

**ҺАҠАУЛАУ**[1] *ҡ.* Һаҡау[1] итеп әйтеү, һөйләшеү. *Һаҡаулап һөйләшеү.* ■ *Юлай яуҙан ҡайтҡанда Салауат та атлаған, ярым-ярты һаҡаулап һөйләшә лә башлаған.* М. Буранғолов.

**ҺАҠАУЛАУ**[2] *ҡ.* Һаҡау[2] менән ауырыу. *Һаҡау сығыу.*

**ҺАҠБАЙ** *с. һөйл. мыҫҡ.* Һаңғырау.

**ҺАҠЛАҒЫС** *и.* **1.** Хәүефле бер нәмәнән һаҡлау өсөн хеҙмәт иткән ҡоролма, механизм. *Электр һаҡлағысы. // Газ юлына баҫым регуляторы, манометр һәм һаҡлағыс ҡлапан ҡуйылған.* Р. Низамов.

**2.** Нимәнелер һаҡлау өсөн төҙөлгән махсус урын, бина. *Иген һаҡлағыс. Йәшелсә һаҡлағыс.* **Һыу һаҡлағыс** һыуҙы йыйыу һәм һаҡлау өсөн яһалма һыу ятҡылығы. *Нөгөш һыу һаҡлағысында 400 миллион кубометр һыу тупланасаҡ.* Ф. Абдуллин.

**ҺАҠЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **һаҡлау**[1] 1. *Иген келәттә һаҡлана.*

**2.** Ваҡыт дауамында юғалмай, бөтмәй, имен көйө тороу. *Борондан һаҡланған ҡомартҡы.* ■ *Уралдың сүйыр ташында атының эҙе һаҡланған Ҡаһым кеүек ир ҡайҙа.* Р. Ниғмәти.

**3.** Онотолмау, иҫтә тороу. *Хәтерҙә һаҡланыу.* ■ *Ватан, халҡым һәм үҙ балам һаҡландылар минең күңелдә.* Ғ. Сәләм.

**4.** Сифатын үҙгәртмәй, боҙолмай тороу. *Алма яҡшы һаҡланған. Ҡаҡлаған ит оҙаҡ һаҡлана.*

**5.** Кемдән йәки ниҙәндер үҙеңде ҡурғау, ҡурсалау. *Дошмандан һаҡланыу.* ■ *[Халыҡ — Бабсаҡҡа:] Һаҡлана күр, батыр, был әҙәмдән. Ул бер-бер шомлоҡ уйлап йөрөй бында.* «Бабсаҡ менән Күсәк». / Насар тәьҫир, хәүеф-хәтәрҙән үҙеңде ҡурсыу. *Ауырыуҙан һаҡланыу. Бәлә-ҡазанан һаҡланыу. Ут-күҙҙән һаҡланыу.*

● *Эттең тынынан, бесәйҙең йөнөнән һаҡлан.* Әйтем.

**ҺАҠЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **һаҡлау**[1]. *[Мулла:] Уны [ҡыҙҙы] кире тартып алғанда ла, ике ай ғиҙҙәт һаҡлатып, көттөрмәй хәлебеҙ юҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**ҺАҠЛАУ**[1] *ҡ.* **1.** Нимәнелер булған көйөнсә, үҙ сифаты, үҙ булмышында имен-аман хәлдә тотоу. *Тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлау. Тәбиғәтте һаҡлау.* ■ *Сәғәттең тышы көмөш, өҫтө алтын һәм төрлө таштар менән биҙәкләнгән. Шуға күрә мин уны юғалтмай һаҡлап йөрөй инем.* Д. Юлтый. *Гурзуф бына Пушкин йөрөгән урын. Бына ул ултыртҡан кипарис, һин ҡара һәм һаҡла, хужаһы һин.* Ҡ. Сәләм. *Күрәм: үҙ олпатын боҙмай һаҡлап, Урал ята әкрен, тын ғына.* Ш. Бабич. / Нимәнелер бирәр маҡсат өсөн билдәләп ҡуйыу, кемгәлер атап тотоу. *Ҡаҡлаған ҡаҙҙарҙы түйгә һаҡлау. Малды һуғымға һаҡлау.* ■ *Өҫтәл өҫтө һыуһылыу әбейҙең күп йылдарҙан бирле «улым ҡайтҡас ҡына һыйға тотор өсөн» тип һаҡлап ҡуйған ҡыҙыл сыбар ашъяулыҡ менән ябылған.*

Ғ. Дәүләтшин. *Был алкаларҙы Сакай ағайҙың катыны ла такманы. Оло бит инде, ул да ҡыҙына һаклағандыр.* Б. Бикбай.

**2.** Юкка сығыуға, боҙолоу, зарарланыуға юл ҡуймай имен тотоу. *Ашлыкты кырауҙан һаклау. Һыуыктан һаклау. Елдән һаклау.* ■ *Һуң тыуған сибек быҙауҙарға күп кәрәкме ни? Уларҙы март айында һалкындан һаклауы ла кыйын,— тине Фәхри.* Б. Бикбай. *Кәртәләге күксәй һукраныn, кешнәп ебәрҙе. Бурандан һаклап, утлыкка бикләнгән ат .. урамға сыкты.* Т. Хәйбуллин.

**3.** Ҡайғыртыу, хәстәрлекле булыу; ҡарау. *Балалрҙы һаклау. Һаулыкты һаклау..* ■ *[Әбей Сәгиҙәгә:] Йәшлегеңдең кәҙерен белеп йәшәргә тырыш, һаулығыңды һакла — үтеп киткән йәш ғүмер һағындыра ла, үкендерә лә икән.* М. Тажи. *Һакла кыҙҙы яман күҙҙән, хыянаттан — тоғроларҙы, етемлектән — сабыйҙарҙы.* Р. Бикбаев. / Әрәм-шәрәм итмәй, сама менән, ҡәҙерләп тотоноу (аҙыҡ-түлек, кейем-һалымды һ. б.). *Итте һаклап ашау. Кейемде һаклап кейеү. Акcаны һаклап тотоноу. Бесәнде һаклап ашатыу.* ■ *Беҙ берәр күлдәкте кеймәй һаклап килә инек.* С. Агиш.

**4.** Яу, һөжүмдән, төрлө хаслыҡ менән ил тыныслығын боҙорға теләүселәрҙән ҡурсалау, именлекте тәьмин итеү. *Ватанды һаклау. Ил һаклау. Сик һаклау.* ■ *Башкорт халкы тарихта гәйрәт менән фаш булған; тыуған илен һаклауға үҙе булған таш курған.* Ш. Бабич. *Тыуып-үҫкән илде — ерҙе һаклау ата-олатайҙарҙың йолаһы. Беҙ һакламай уны кем һаклаһын, кош та һаклай үҙенең ояһын.* Ҡ. Даян./ Насар тәьҫир, хәүеф-хәтәрҙән ҡурсыу. *Бәлә-казанан һаклау.* ■ *[Һәүбән — Нәркәскә:] Айырманым күлеңдән, һаклап калдым үлемдән.* «Аҡбуҙат».

**5.** Күҙ уңында тотоп, өҙлөкһөҙ күҙәтеү; ҡарауыллау. *Улар [эттәр] тора төрлө поста, һаклайҙар келәт, өйҙәр.* Ғ. Амантай. *Кыҙрас йондоҙ кашканы бер көн һаклай, ике көн һаклай, бейә колонламай* (Әкиәттән).

**6.** Боҙмай, үҙгәртмәй, тарҡатыуға юл ҡуймай, булған көйө дауам иттереү, тормошҡа ашырыу. *Абруй һаклау. Ғәҙәт һаклау. Намыҫ һаклау. Таҙалык һаклау. Тәртип һаклау. Әҙәп һаклау.* ■ *Умәр карттың килене Сөйөмбикә әҙәп һаклап, бер ни ҙә өндәшмәне.* Ш. Янбаев. *[Нәркәс:] Атай, һинән үтенәм, һакла кыҙың намыҫын.* «Аҡбуҙат». *Ил намыҫын һаклап, яуға сығыу — батыр егеттәрҙең бурысы* (Халыҡ йырынан).

**7.** Онотмай иҫтә тотоу, күңелдә йөрөтөү (төрлө хис, тойғоно һ. б.). *Асыу һаклау. Йөрәктә йылы хистәр һаклау. Күңелдә үпкә һаклау.* ■ *Мәңге онотмай һаклармын йөрәктә ярлы халкым ниҙәр күргәнен.* Т. Йәнәби.

**8.** Башҡаларға белдермәй үҙеңдә тотоу (сер, һүҙҙе һ. б.) *Сер һаклай белмәү.* ■ *Гәрәй кайткас та .. Бибикамал еңгә асыулы һүҙҙәрен әйтмәне. Вакыты килеп еткәс әйтермен әле, тип эсендә һаклап калдырҙы.* А. Карнай. *Күршеләр ҙә Юламандың изге ниәтле был серен каты һакланы.* З. Биишева.

**9.** *мыҫк.* Берәр нәмә йәки кеше янында тиккә, файҙаһыҙға ваҡыт үткәреүгә ҡарата әйтелә. *Ир һаклап ултырыу.* ■ *[Салих:] Ниңә ауылға кайтып, кейем туҙҙырып йөрөргә. Барыбер бөтә йәй Ырымбур күперен һаклап үтә. Атай-әсәй юк.* С. Агиш. *[Әбей:] Бында һерәйеп ултырған сыуалды һаклап ятыуҙан файҙа сыкмаҫ, улым. Илгә сығып, өҫ-башыңды бөтәйтеү яйын карар инең* (Әкиәттән).

♦ **Алла һаҡлаһын** нимәнеңдер шулай булыуын теләмәгәндә әйтелә. *[Мәгүзә:] Мин башламаным! Аллам һаклаһын, .. яҙа күрмә, туғаным, кағыҙға, минең имсәк балам бар!* Б. Бикбай. **Һаҡлау еңгә** *шаяр.* боронғо йола буйынса ире үлеп китһә, ҡәйнешенә барырға тейеш булған еңгә. *[Егет:] .. Рәйсә минең һаклау еңгә, ағай үлһә, минеке була* (Хикәйәттән).

● *Бер тин һумды һаклай, бер көн йылды һаклай.* Әйтем. *Дошмандан илең һакла, ярамһактан серең һакла.* Әйтем. *Иҫке тимерҙе һаклаһаң, алтын булыр.* Әйтем. *Тун һаклаһаң — тунға етә, аш һаклаһаң — ашка етә.* Мәҡәл. *Һаклап тотһан — мең көнлөк, һакламаһаң — бер көнлөк.* Мәҡәл.

**ҺАҠЛАУ** [2] *и.* Тәбиғәттең кеше ҡулын тейҙермәй һаҡланған урыны. *Һаклау урманы. Һаклауҙа һунар итеү тыйыла.*

**ҺАҠЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **һаҡлау** [1] 1, 2, 4, 5. *Урман һаклашыу.*

**ҺАҠЛЫ** *с. кар.* **һаҡсыл.**

● *Һаклының һағы ятыр, һакһыҙҙың башы ка тыр.* Әйтем.

**ҺАҠЛЫҠ** *и.* **1.** Хәүеф-хәтәр, төрлө шик, шомдан һаҡланыуға йүнәлтелгән уяулыҡ, абайлыҡ. *Һаклык сараһы. Һаклык күрһәтеү.* ■ *Караңгыла быҙлаған тәмәке уты янында ике кеше һаклык менән генә һөйләште.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ҡылыҡ, ҡыланыштағы йомшаҡлыҡ, әҙәплелек; иплелек. *Тимер .. һаклык менән Нинаның башлығын, пальтоһын систерә башланы.* Б. Бикбай.

**3.** Бик кәрәк саҡта тотонор өсөн йыйып ҡуйған нәмә. *Колхоздың .. коро йылдарҙы һиҙмәй ҙә уҙып китерлек байлығы, һаклығы булырға тейеш.* З. Биишева.

♦ **һаҡлыҡ кассаһы** һалынған аҡсаны һаҡлай торған кредит ойошмаһы. **Һаҡлыҡ кенәгәһе** һаҡлыҡ кассаһында аҡса һаҡлаусыға бирелә торған кенәгә.

● *Һаклыкта хурлык юк.* Әйтем.

**ҺАҠМА** *и.* Үлән өҫтөндәге эҙ.

**ҺАҠМАНСЫ** *и. диал.* Мал ҡыуыусы.

**ҺАҠ-СУҠ** *и. кар.* **Саҡ-Суҡ.** *Һак-Сук шикелле йәшәнек беҙ икебеҙ ике илдәрҙә.* Ғ. Шәрипов.

**ҺАҠСЫ** *и.* **1.** Һаҡта торған ҡораллы кеше йәки төркөм. *Ил һаксыһы.* // *Һаксы һалдат.* ■ *Дошман түгел, кош та уҙа алмаҫ беҙҙең һаксы торған тирәнән.* К. Рәшит. *Һаксы тора һағында, кара төн як-ягында, ауһа алмаштырырға тип, мин торамын янында.* Р. Ниғмәти./ Тотҡондо һаҡ аҫтында ҡарауыллап йөрөтөүсе. *Батша кырк һаксы ебәреп, Таҙҙы үҙ батшалығына килтертте, ти* (Әкиәттән).

**2.** Нимәнеңдер именлеген, теүәллеген һаҡлаған кеше; ҡарауылсы. *Келәт һаксыһы.* ■ *Һаксы тора һағында, кара төн як-ягында.* Р. Ниғмәти./ Кемделер янында һаҡлап йөрөүсе. *Батша*

*һаҡсыһы./* Ниҙелер ҡурсып тороусы. *Мин — гөлдәрҙең дуҫы, һаҡсыһы.* Ғ. Амантай. *Хужа түгел, был йыһанға тогро һаҡсылар кәрәк.* М. Кәрим.

**3.** *спорт* Футбол, хоккей һ. б. уйын уйнағанда тупты ҡапҡаға ебәрмәй һаҡлаусы.

**һАҠСЫЛ** *с.* Нәмәне һаҡлап, әрәм-шәрәм итмәй тотоусан. *Һаҡсыл хужа. Һаҡсыл булыу.* ■ *Өйҙә кәләм заты ла, яҙыу ҡараһы ла табылманы. Башлыҡ һаҡсыл кешеләрҙән түгел ине.* М. Кәрим.

**һАҠСЫЛЛЫҠ** *и.* Әрәм-шәрәмгә юл ҡуймай, һаҡлап тотоусанлыҡ. *Һаҡсыллыҡ саралары. Һаҡсыллыҡ менән тотоноу.*

**һАҠТАШ** *и. диал.* Бишташ. *Һакташ уйнау.*

**һАҠТЫРЫУ** *к.* Ауҙарғанда, ағыҙғанда эргәләге, ситтәге бер нәмәгә эләктереп, төкәтеп туҡтатыу. *Агасты һактырыу. Кәшмәкте ярга һактырыу. Ҡорт айырганда һактырыу өсөн тимер сыкылдаталар.*

**һАҠһЫҘ** *с.* **1.** Хәүеф-хәтәргә иғтибар итмәй эш ҡылыусан; абайһыҙ. *Һакһыҙ кеше. // Һакһыҙ кыланыу.* ■ *Хужагәле нормаһын үтәй алмай, коралдар менән һакһыҙ кылана.* С. Агиш.

**2.** Ҡаты, аяуһыҙ, ҡылығы тупаҫ; иңһеҙ. *Һакһыҙ кулллы кеше.* ■ *Бер үк юлыкмаһын кыҙ бала, кәҙер белмәҫ һакһыҙ кулдарга.* Ә. Ғайсин.

**3.** Нәмәне теләһә нисек әрәм-шәрәм итеүсән, һаҡлап тотона белмәгән; бәрәшән. *Һакһыҙ хужа.*

**һАҠһЫҘЛЫҠ** *и.* һаҡһыҙ кешегә һ. б. хас сифаттар һәм абай, һаҡ булмаған хәл. *Бейектә был дәһшәтле буранда бик кескәй хата ла, аҙ гына һакһыҙлык курһәтеү ҙә һәләкәткә килтерергә мөмкин.* Д. Исламов. *Кемдеңдер һакһыҙлыгы аркаһында .. йорт яныл китә.* К. Мәргән.

● *Һаклының һагы ятыр, һакһыҙҙың башы катыр.* Әйтем.

**һАҠЫ** *и.* **1.** *кар.* **һаҡа.**

**2.** *диал.* Ашыҡ.

**һАҠЫМ** *и. диал.* Олпат.

**һАҠЫНА** *и.* Бысаҡ, хәнйәрҙең һап төбөндәге ҡыҫып торған балдағы.

**һАҠЫРАТ** *с. диал.* Насар, эшәке (һүҙгә ҡарата). *Һакырат һүҙле кеше. Һакырат һүҙ һөйләмә.*

**һАЛ** *и.* Һыуҙан ағыҙыу өсөн буй-буй теҙеп, бер нисә быуын итеп бәйләгән бүрәнәләр. *Ике быуынлы һал. Һал ишкәге. Һал койрого. Һал төшөрөү. Һал агыҙыу.* ■ *Йылганың тар урындарын, агын, шарлауыклы, сүгермәкле ерҙәрен үтәһең. Һал бөгөлөп китә. Ана шунда һалды һаклаpга, койрокто оҫта тоторга кәрәк.* С. Агиш. **Ҡара һал** теләһә ниндәй ағастарҙан бәйләгән һал. **Өҫтәмә һал** һалдың артына өҫтәп тағылған бәләкәй һал. **Төп һал** һалдың ҡойроҡ яғындағы иң мөһим быуыны.

**һАЛАБАШ** *и.* Йүкә ағасының йомшаҡ йүкәһен серетеп һыҙырыу өсөн һыуға батырылған ҡабығы. *Һалабаш йүкәһе. Һалабаш батырыу. Һалабаш бәйләү. Һалабаш һалыу. Һалабаш һыҙырыу.* ■ *Ташбаткан кешеләре өсөн иң шәп кәсеп — һалабаш. Йәй, йүкә агасы ашкаяк сакта, уны куптарып, күлгә баҫыралар.* Ж. Кейекбаев. **Һалабаш төшөрөү** йүкә ағасының ҡабығын һыҙырыу. *[Сәлмән] һалабаш төшөрөрмөн дә аркан ишермен, септә һугырмын, тип уйлаган* (Әкиәттән).

**һАЛАҠ** *с. диал.* Әрпеш, шамтыр. *Еңгәй егәрлерәк булһа, уны [көлдө] кыргарак ташлай, һалагырак булгандары ишектең ауыҙына ук өйә бирә.* Ғ. Дәүләтшин.

**һАЛАЛАЙ** *с. диал.* Лыс һыу (итәк-еңгә ҡарата). *Һалалай булыу.*

**һАЛАМ** [*рус.* солома] *и.* Бөртөклө ашлыҡтың һуҡҡандан һуң ҡалған һабағы. *Арыш һаламы. Һоло һаламы. Һалам эҫкерте. Һалам башлы өй.* ■ *Уянганда беҙ ауыл һарайында һалам өҫтөндә ята инек.* Д. Юлтый.

◆ **һалам** аяҡ уйын исеме (түңәрәкләп ултыралар; берәү «әсәй» була, ул шым ғына һәр «балаһына» берәр исем атап сыға; ситтә «һалам аяҡ» ултыра; ул килә лә, бер «балаға» бер исем әйтеп өндәшә; теге бала һикереп тороп, һыңар аяҡлап ҡаса; «һалам аяҡ» уны һыңар аяҡлап баҫтыра; был «бала» тотолмаһа, кире ҡайтып ултыра, тотолһа, «һалам аяҡҡа» ярҙамсы була).

**һАЛАМ-ТОРХАН** *и. һөйл.* Тыштан шәп күренеп, ғәмәлдә хөрт, насар булған нәмәгә әйтелә.

**һАЛАСА** *и.* **1.** Төп яғы кәкерәйеңкерәп торған ике ағасты ҡуша бәйләп, ос яғын тәртә итеп, ат егеп, таулы, урманлы ерҙән йөк һөйрәтә торған йәйге сана; һәйрәтке. *Һаласа менән бүрәнә тарттырыу.* ■ *Улар [яңы быуын кешеләре] һырттарҙан һаласа менән бүрәнә тартып, тарма үҫкән урындарга өйҙәр килтереп бурагандар.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *диал.* Көлтә арбаһы.

**һАЛАТ** [*рус.* солод] *и.* **1.** Буҙа ҡойоу өсөн шыттырылған бойҙай, арыш, һоло йәки башҡа ярмалар. *Һалат киптереү. Һалат тартыу.*

**2.** Шытып бәбәкләнеп, шәкәрләнгән иген арыш, бойҙай һ. б.

**һАЛАУЫР** *с. диал.* **1.** Аңра.

**2.** Әрпеш.

**һАЛБЫР** *с.* **1.** Һалынып, һалпайып төшкән. *Һалбыр колаклы эт. Һалбыр яга.*

**2.** *диал.* Ығыш.

**һАЛБЫРАТЫУ** *к.* Нимәнелер түбәнгә һалындырыу. *Аяктарҙы һалбыратып ултырыу.*

**һАЛБЫРАУ** *к.* Һалпайыу, аҫҡа һалыныу. *Ирене һалбырап төшкән.* ■ *Шәрифулланың ҙур ямаулы киндер күлдәгенең итәге аҫтынан .. сүс бау һалбырап тора.* Я. Хамматов. **Һалбырап төшөп йөрөү** итәк-еңде йыя алмай, шамтырап йөрөү.

**һАЛБЫРАШЫУ** *к. урт. кар.* **һалбырау.**

**һАЛДАМА** *и. диал. кар.* **фал** [1] 1. *Һалдама асыу. Һалдама һалыу.*

**һАЛДАТ** [*рус.* солдат] *и.* Армияла хеҙмәт итеүсе хәрби дәрәжәһе булмаған кеше. *Һалдат кейеме. Һалдат хеҙмәте. Һалдат булыу. Һалдатта йөрөү. Һалдатка алыныу.* ■ *Һалдат! Һалдат!.. Ватан ҡайҙа ҡушһа, ул шул ерҙә именлеген һаклай тормоштоң.* А. Игебаев.

◆ **Һалдат уйыны** хеҙмәттәге кешеләрҙең хәрби әҙерлек күнекмәһе. *Һалдат уйыны үткәреү. Һаодат уйынында катнашыу.*

**һАЛДАТКА** [*рус.* солдатка] *и. һөйл.* Һалдатта йөрөгән кешенең ҡатыны. *Һалдатка булыу.*

**ҺАЛДАУ** *и.* Осо ырғаҡлы бер нисә асанан торған балыҡ сәнсеү ҡоралы. *Ғәйзулла бабайҙың һалдауы тек итеп кенә ҡала. Һалдауын һыуҙан күтәргәндә уның теше араһында ҡарыш буйлыҡ бәрҙе леберләп тора ине.* Н. Мусин.

**ҺАЛДАУЛАУ** *ҡ.* Һалдау менән сәнсеү. *Балыҡ һалдаулау.*

**ҺАЛДЫРТЫУ** *ҡ.* **1.** *йөкм. ҡар.* **һалдырыу.**

**2.** Ҙур тирмәндә тарттырыу. *Он һалдыртыу.*

**ҺАЛДЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **һалдырыу** 3.

**ҺАЛДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** *йөкм. ҡар.* **һалыу**[1] 1—20, 25, 26. ■ *Ҡайтып китә лә был бай, ит һалдыра* (Әкиәттән).

**2.** Сисеп, систереп алыу. *Аттың эйәрен һалдырыу. Баланың кейемен һалдырыу.* ■ *Арба менән килгән крәҫтиәндәр .. аттарының ауыҙлыҡтарын һалдыралар.* С. Агиш.

**3.** Ҙур тирмәндә тартыу. *Иген һалдырыу. Он һалдырыу.*

**4.** *күсм.* Бик шәп итеп атлау йәки йүгереү. *Һалдырып сығып китеү.* ■ *Еңелерәк һөйәклеләре йәйәүләп, ҡайтыр яҡҡа һалдыралар.* Т. Килмөхәмәтов.

**5.** *күсм.* Бик шәп итеп уйнау (музыка ҡоралында). *Хәйри тальянда һалдыра.* Н. Мусин.

♦ **Ат һалдырыу** ат ектереү. *Залда ултырыусылар.. Ат һалдырып алдынғы тәжрибәне өйрәнергә килгән.* Х. Ҡадиров. **Һалдырып алыу** көслөк менән тартып алыу. *Кешенең ҡоралын һалдырып алыу.* ■ *[Ныязгол:] Үмәрҙе кире дүндереп, ҡыҙҙы һалдырып алырға кәрәк.* Һ. Дәүләтшина. *Айыуҙан саҡ һалдырып алып ҡалдым айғырҙы.* К. Ибәтуллин.

**ҺАЛҠЫ** *р.* Ҡуҙғалыр-ҡуҙғалмаҫ, иренеп, йыбанып. *Һалҡы ғына баҫып атлау.* ■ *«Йөгөн һалғас, һалҡы икән,.. гере, төшөп туҡтап ҡалған сәғәт тә.* Й. Солтанов.

**ҺАЛҠЫН I** *с.* **1.** Һыуыҡлығы көслө түгел, әҙ генә һыуыҡ. *Һалҡын ел. Һалҡын көн. Һалҡын һауа. Һалҡын һыу. Һалҡын булыу.* ■ *Маңлайҙан һалҡын тир бәреп сыҡты.* С. Агиш.

**2.** *күсм.* Йылы тойғоһоҙ, ихлас булмаған. *Һалҡын ҡараш. Һалҡын мөнәсәбәт. Һалҡын ҡаршылау.* ■ *Беҙ ярлы булғанға күрә хәлфә беҙгә бик һалҡын ҡарай торған булды.* М. Ғафури.

**II** *и.* Бер сама ғына, көслө һыуыҡ булмаған һауа. *Иртәнге һалҡын.* ■ *Йәйҙең генә эҫе селләһендә йылҡым сыҡмай киске һалҡынһыҙ* (Халыҡ йырынан).

♦ **Һалҡын алыу** 1) эҫенән һуң саф һауала тәнде һыуытыу; һыуыныу. *Аш ашап бөткәс, ирҙәр тышҡа сығып, һалҡын алып инде.* Ж. Кейекбаев. *Һары ат мендем, һаҙҙар кистем, һары аткайым һалҡын алһын тип* (Халыҡ йырынан); 2) *шул уҡ* **һыуыҡ тейеү** *ҡар.* **һыуыҡ. Һалҡын тәбиғәтле** (*йәки* **ҡанлы**) уйлап эш итә торған, ҡапыл ҡыҙып бармаған (кешегә ҡарата) **Һалҡын һүҙ** тупаҫ, насар һүҙ.

● *Ҡолаҡтан ингән һалҡын һүҙ йөрәккә барып боҙ була.* Әйтем.

**ҺАЛҠЫНАЙТЫУ** *ҡ.* **1.** Һалҡынға әйләндереү, һалҡын итеү. *Тиреҫ еле көндө һалҡынайта.*

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **һалҡынайыу** 1. *Кискә табан һалҡынайта.*

**ҺАЛҠЫНАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Һалҡынға әйләнеү, һалҡын булыу. *Һауа һалҡыная төштө. Күктә әҙ-мәҙ генә болоттар ҙа күренә.* С. Агиш.

**2.** *күсм.* Һалҡын тойғолоға әйләнеү, һалҡын булыу; һыуыныу. *[Зәйнәп:] Сәйҙел, нимә булды? Һалҡынайҙың, Сәйҙел, һин ниңә?* Ғ. Сәләм.

**ҺАЛҠЫНЛАНЫУ** *ҡ. ҡар.* **һалҡынайыу.**

**ҺАЛҠЫНЛЫҠ** *и.* **1.** *ҡар.* **һыуыҡлыҡ.**

**2.** *күсм.* Һалҡын, күңел йылыһы булмаған, иғтибарһыҙ мөнәсәбәт. *Һалҡынлыҡ күрһәтеү.*

**ҺАЛҠЫНСА** *с.* Әҙ генә һалҡын; елеҫ. *Һалҡынса һауа.* ■ *Туғайлыҡтарға табан төштө, һалҡынса ел сыҡты.* М. Тажи.

**ҺАЛЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **һаллау.** *Һалланған ағас.*

**ҺАЛЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **һаллау.** *Аҡсулпанов ҡышын ағас ҡырҡыу, йәйен ул ағасты һаллатып ағыҙыу эштәрендә булды.* Ғ. Ғүмәр.

**ҺАЛЛАУ** *ҡ.* Ағастарҙы һал итеп бәйләү, һал яһау. *Бүрәнә һаллау.* ■ *Яҙ көнө ҡыуғынға йөрөйҙәр, бүрәнә һаллайҙар.* Ж. Кейекбаев. *Яҙын ярһып ташҡан йылға буйлап күпме һалдар һаллап ағыҙҙым.* Ш. Галин.

**ҺАЛЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **һаллау.** *Һал һаллашыу.*

**ҺАЛМА** *и.* **1.** Итле ашҡа һалыр өсөн йоҡа ғына итеп йәйеп, шаҡмаҡлап ҡырҡҡан сөсө ҡамыр. *Һалма баҫыу. Һалма йәйеү. Һалма ҡырҡыу.* ■ *Байҙың килене Фариза .. ҡырҡҡан һалмаларын һалып, һурпа ла ҡайната башланы.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡаҙаҡ һалмаһы** ғәҙәттә итле ашҡа һала торған эре дүрткел һалма. **Ҡул һалмаһы** *йәки* **сумар һалма** ҡул менән өҙөп яһаған һалма.

**2.** Шуны һалып бешерелгән ит ашы. *«Ите күп булмағас, һалма тәмле булалыр шул!» — тием мин һаман аптырап.* З. Биишева.

**3.** (*йәки* **йәйҙәк һалма**) *диал.* Итһеҙ һалма ашы. *Һалма бешереү. Һалма эсеү.*

♦ **Һалма биҙәк** шәл ситенең уртаһына бәйләй торған шаҡмаҡ-шаҡмаҡ биҙәк. **Ҡырҡ һалма** ҡоторған эт тешләгәндә яһалған им (бер кеше өй һайын арты менән инеп, алды менән сығып, төрлө аҙыҡ йыя; шуны эт тешләгән кешегә ашаталар).

**ҺАЛМАҒАЙЫУ** *ҡ. ҡар.* **һалмаҡланыу.**

**ҺАЛМАҠ** *с.* **1.** Дәүмәле ҙур булмаһа ла ауырлығы бар, тос. *Һалмаҡ таш. Һалмаҡ төйөнсөк. Игендәр быйыл һалмаҡ, тос башаҡлы.* ■ *Пальма, пальма, һалмаҡ япраҡтарың, ниндәй ҙурҙар, ниндәй йәшелдәр!* Х. Ҡунаҡбай.

**2.** Яй, әкрен хәрәкәтле. *Һалмаҡ аҙым. Һалмаҡ хәрәкәт. // Һалмаҡ баҫыу. Һалмаҡ атлау.* ■ *Буранбайҙы алдан төшөрөп, .. уның оҙон, һалмаҡ аҙымдарына ҡарап, бер нисә йөҙ саҡырым юл үтә инек.* Д. Юлтый. *Беҙҙең туры ат һалмаҡ ҡына юрта.* Ә. Чаныш.

**3.** Әкрен бер тигеҙ генә тыныс, яй яңғырашлы. *Һалмаҡ тауыш. Һалмаҡ йыр. // Һалмаҡ ҡына йырлау. Һалмаҡ итеп йырлау.* ■ *Һалмаҡ ағылған ҡурай моңона Гөлдөң асыҡ, саф тауышы ҡушылды.* Ф. Әсәнов.

**ҺАЛМАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Һалмаҡҡа әйләнеү, һалмаҡ булыу; һалмағайыу. *Хөсөттәрҙең йөрәктәре*

*һалмакланды, көррәһе ауыр булды тарта алмаҫтай.* Аҡмулла.

**ҺАЛМАҠЛАТЫУ** *к.* Һалмаҡка әйләндереү, һалмаҡ итеү. *Аҙымды һалмаклатыу.*

**ҺАЛМАҠЛАУ** *к.* **1.** Яй, әкрен, бер тигеҙ генә хәрәкәт итеү. *Туң ергә иренеп, һалмаклап кына күбәләк кар һибелә.* З. Биишева. *Акрын ғына кағып дилбегәһен, Бакый бабай атын юрттыра. .. Ат һалмаклап, алға табан алымын арттыра.* Ғ. Амантай.

**2.** Ҡулға алып, ауырлығын самалау. *Төргәкте һалмаклап карау.*

**ҺАЛМАЛҒЫС** *и.* Һалманы һурпанан һөҙөп алыу өсөн талдан үреп йәки тишекле итеп яһалған сүмес.

**ҺАЛМАЛЫҠТАН: һалмалыҡтан турау** ваҡ-ваҡ киҫәк итеп турау. *Карасай батыр тегене [Ялмауыҙҙы] йығып, һалмалыктан турап, өҙгөләп китте, ти* (Әкиәттән).

**ҺАЛМАУЫР** *и.* **1.** Ҡош, йәнлекте һуғып ала торған ауыр, һәлмәк таяҡ (ғәҙәттә һунарҙа ҡулланыла). *Тәкәне эҙләп, мин өйҙән яланға килеп сыктым. Бүрене һалмауыр менән бик елле һалып йыктым.* К. Хәбиб.

**2.** Ауыр нәмәне күтәртә торған күҫәк; алма. *[Зөһрә:] Катып тормағыҙ, һалмауыр алығыҙ. Был бүрәнәләрҙең бөтәһен дә бер ергә өйөргә кәрәк.* Н. Мусин.

**ҺАЛМАУЫРЛАУ** *к.* **1.** Һалмауыр (1 мәғ.) менән киҙәнеп һуғыу. *Таш менән теге мәлғүнде [йыланды] һалмауырлап ебәргәйнем, .. ялпайҙы ла куйҙы* (Әкиәттән). *Ата-әсәйем мине кырға бирҙе, һалмауырлап бәргән таш кеүек* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Туҡмау. *Әллә ниндәй кешеләр кемделер һалмауырлай.* Я. Хамматов.

**ҺАЛПАЙТЫУ** *к.* Түбәнгә һалындырып төшөрөү. *Өлкән карттар «апай» тип киләләр, аппак һакалдарын һалпайтып.* Д. Юлтый.

**ҺАЛПАЙЫУ** *к.* Ялпылдап, һалынып төшөү; һалбырау. *Һалпайып тороу.* ■ *Миһран колактары һалпайған, ирендәре шамтыраған бер егерме биш йәшлек бейәне менгән.* Ш. Шәһәр.

**ҺАЛПАЙЫШЫУ** *к. урт. кар.* **һалпайыу.**

**ҺАЛПАҠ** *с. диал. кар.* **һалпы** 1.

**ҺАЛПАНЛАУ** *к.* Һалп-һолп килеү, һалп-һолп итеү. *[Закир] бөгөн дә бошоноп, эйәр кашағаһына тағылған турһыҡ шикелле, мәйелһеҙ һалпанлап бара.* З. Биишева.

**ҺАЛП-ҺОЛП** *окш.* Аҫка-өҫкә, уңға-һулға ауыр сайҡалғанды белдергән һүҙ. *Һалп-һолп атлау. Һалп-һолп йүгереү.* ■ *Атын юрттырған сакта [Миһран] ике кулы менән теҙгенгә йәбешә лә һалп-һолп итеп килә.* Ш. Шәһәр.

**ҺАЛПЫ** *с.* **1.** Ялпылдап, һалынып төшкән; һалпыш, һалынҡы. *Һалпы кикерекле этәс.* ■ *Була матур һалпы колак .. токомло эттәр.* Ғ. Амантай.

**2.** *диал.* Булдыҡһыҙ. *Һалпы кеше.*

◆ **Һалпы тел** теленә баш була алмаған кешегә ҡарата әйтелә. *Һалпы якка һалам кыҫтырыу кар.* **ҡыҫтырыу.**

**ҺАЛПЫЛДАУ** *к.* Һалп-һолп итеү, һалп-һолп килеү. *Һалпылдап тороу. Аркаһындағы буш токсайы һалпылдап бара.*

**ҺАЛПЫШ** *с.* Аҫҡа һалынып торған. *Һалпыш колак.* ■ *Акбәкәл [ат] һалпыш ирендәрен кыймылдатып, теше менән Корманғазы ағайҙың иңбашын тызый башланы..* Р. Солтангәрәев.

**ҺАЛСЫ** *и.* Һал ағыҙыусы, һал ҡыуыусы. *Туктаткандар аккан һалдарын һалсылар, балталарын күтәргәндәр урмансылар.* М. Хәй.

**ҺАЛСЫҠ** *и. диал.* Ҡылы. *Һалсык аша кисеп сығыу.*

**ҺАЛТАН** *с.* **1.** Йөкһөҙ, бер нәмәһеҙ, буш ҡуллы; буш. *Һалтан кеше. // Һалтан йөрөү. Һалтан килеү.*

**2.** Бала тапмай торған, биҙәү (ҡатынға ҡарата).

**ҺАЛЪЯ** *и. диал.* Талпан. *Эт һалъяһы.*

**ҺАЛЫҠ** *и.* **1.** Өҫкә төшкән ауырлыҡ, бәлә. *Кешегә һалык булыу. Һалығын һалыу.* ■ *Кем белмәй һуң йыуан корһак кулакты, .. батрактарҙың эш-көсөнән кинәнеп, ауылға һалык булған эрәм тамакты?* Х. Ғәбитов.

**2.** *диал.* Һалым, яһаҡ. *Нуғай мырҙаларына түләнгән түләктән дә, Казан хандары һалған һалыктан да яманырак ине былар.* Ғ. Ибраһимов.

**ҺАЛЫМ** [1] *и.* Берәр ойошманан, халыҡтан һ. б. алыу өсөн хөкүмәт тарафынан билдәләнгән түләм аҡса йәки башҡа нәмә; яһаҡ. *Һалым аксаһы. Һалым йыйыусы. Һалым түләү.* ■ *Казан ханлығы феодалдары ла, .. П. И. Рычков әйткәнсә, «башкорттарҙы тағы ла күберәк бөлгөнлөккә төшөргәндәр һәм көс етмәҫлек һалымдар түләткәндәр».* Р. Кузеев, Б. Юлдашбаев. *Абдулла ахун ил аралап, һалым һалған һәр йортка* (Халыҡ йырынан).

**ҺАЛЫМ** [2] *бәйл. диал.* Табан, тартым. *Кискә һалым. Таңға һалым. Яҙға һалым.*

**ҺАЛЫНДЫРЫУ** [1] *к. йөкм. кар.* **һалыныу** [1] 2. *Елән һалындырыу. Селтәр һалындырыу.*

**ҺАЛЫНДЫРЫУ** [2] *к.* Нимәнелер түбәнгә аҫылындырыу, һалбыратыу. *Аякты һалындырып ултырыу.* ■ *Сәсмәү кеүек суктар һалындырып, бер карт кайын үҫә яңғыҙы.* С. Кулибай.

**ҺАЛЫНҠЫ** *с.* **1.** Һалынып, аҫылынып төшкән. *Һалынкы итәк. Һалынкы булыу.*

**2.** *күсм. һөйл.* Булдыҡһыҙ, дәртһеҙ.

● *Үҙе һалынкының аты абынкы.* Әйтем.

**ҺАЛЫНЫУ** [1] *к.* **1.** *төш. кар.* **һалыу** [1] 1—17, 24—27. *Иген йыйып алынған, келәткә һалынған.* Ғ. Дәүләтшин. *Ярты өлөшө ерҙән каҙылған барак. Ике ягына һикеләр һалынған.* Д. Юлтый. *Каҙан тултырып һалынған ит бешкәнсе, Татлыбикә куняктарын сәй менән һыйланы.* Я. Хамматов. *Карамалы ауылында .. шыңғырап торған карағайҙан һалынған калай түбәле йорт калкып сыкты.* М. Тажи. *Икмәк ҙур хеҙмәт менән, кара тир түгеп табыла. Унда игенсенең дә, эшсенең дә, ғалимдең дә хәләл көсө һалынған.* Ә. Моратов. *Мул итеп һалынған хеҙмәт бирә уңыштың мулын.* Р. Ниғмәти. *Заятүләк шым ғына арттан килеп, таш өҫтөнә һуҙып һалынған сәс толомон капыл тотоп ала.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». *Көмөшбайҙың йортонан алып батшаның һарайына саклы көмөш күпер һалынған* (Әкиәттән).

**2.** Өҫкә һалыу (кейем-һалымды). *Елән һалыныу. Селтәр һалыныу. Шәл һалыныу.* ■ *[Зә-*

*лифә] йәшел бәрхәт кәзәкей эсенән өлкән һакал һалынған.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *кар.* **Һалышыу** 2—4. *Сабый имсәктән бөтөнләй төңөлөп, ашауға һалынғайны инде һәм бик ашамһаҡ, талымһыҙ ине.* Ж. Кейекбаев. *Көс, тир түкмәй генә күл каушырып, башкаларға әгәр һалынһам, намыҫым етмәҫ, әҙер яңы йортка баҙнат итеп күсенеп барырға.* М. Тажи. *Эшең кире китеп, алға барған юлдарыңа төшһә кәртәләр, таныш кешеләрең ҡсраһалар, күрмәмешкә һалынып үтәләр.* М. Ғафури.

**ҺАЛЫНЫУ** [2] *к.* Түбәнгә аҫылыныу; һалбырау. *Һалынып төшөү.* ■ *Носрат карттың күҙ кабактары һалынды, ялбыр каштары емерелде.* Н. Мусин. *Кып-кыҙыл булып тора һалынып миләш тәлгәштәре.* Ш. Бабич. *Аткынайың булһа, ерән булһын, ял-койроғо ергә һалынһын* (Халыҡ йырынан).

**ҺАЛЫУ** [1] *к.* **1.** Берәр нәмәне билдәле бер урынға ятҡырып ҡуйыу. *Баланы карауатка һалыу. Бүрәнәне ярға сығарып һалыу. Китапты өҫтәлгә һалыу.* ■ *Карт укыуынан туктап, китапты тәҙрә төбөнә һалып куйҙы.* Һ. Дәүләтшина. *Әйләр хандың шымсылары Алпамышаның аяк-кулын сыйыырҙар менән сырмап, оҙон күкрәк арбаға һалып, атын етәкләп алып киткәндәр, ти* (Әкиәттән).

**2.** Нимәнеңдер эсенә урынлаштырыу. *Аксаны кеҫәгә һалыу. Игенде келәткә һалыу.* ■ *Хасбулат олатай .. комарткыларын һандыкка кире һала башланы.* З. Биишева. *Тайморзин кулындағы кағыҙҙы куйын кеҫәһенә бөкләп һалды ла арбаға менеп ултырҙы.* М. Тажи./ Һаҡлау өсөн тапшырыу (банк, һаҡлыҡ кассаһы һ. б.). *Һаклык кассаһына акса һалыу.*/ Билдәле бер маҡсатта ниндәйҙер бер урынға урынлаштырыу. *Больницаға һалыу. Госпиталгә һалыу.* ■ *Шешеү, гангренаға әйләнеүҙән шикләнеп, врач мине госпиталгә һалды.* Ғ. Әмири.

**3.** Өҫкә, яурынға һ. б. ҡуйыу (кейем-һалымды һ. б.). *Муйынға шарф һалыу. Түшкә иҙеү һалыу. Яурынға шәл һалыу.* ■ *Хәйҙәр үҙенең пинжәген дә минең яурыныма һалды.* М. Тажи. *Биленә билғау һалып көрәшкән башкорт йәштәренә берәү ҙә каршы тора алмаҫ.* Ш. Шәһәр./ Билдәле бер маҡсатта нимәнелер өҫтән беркетеү. *Атка эйәр һалыу. Аркалык һалып егеү.* ■ *Туры бейәнең колоно йүгән кейҙергәндә конан, серге һалғанда дүнән, эйәр һалғанда толпар булды, ти* (Әкиәттән)./ Берәр нәмәнең өҫтөнә ҡуйыу, тейҙереп тороу. *Башты мендәргә һалыу. Кулды яурынға һалыу. Эт башын аяғына һалып яткан.* ■ *Эргәмдә берәү баҫып тора. Бер нәмә лә аңламай, уға тағы ла бер тапкыр караным. Ул кулын елкәмә һалды.* С. Агиш.

**4.** Кейемгә нимәләр өҫтәү, беркетеү, ҡуша тегеү. *Итәккә таҫма һалыу. Күлдәкте итәк һалып тегеү. Яғаға селтәр һалыу.* **Ямау һалыу** кейем-һалымды ямау, тишелгән урынға ямау тегеү.

**5.** Төҙөү, ҡороу, эшләү (йорт-ҡаралтыларҙы, хужалыҡ ҡоролмаларын һ. б.). *Күпер һалыу. Өй һалыу. Һарай һалыу. Мәктәп һалыу. Мунса һалыу.* ■ *Сәйҙел һала завод нигеҙен, техник булып корпус төҙөшә.* Ғ. Сәләм./ Төҙөү, ҡороу эшендә кирбес һ. б. теҙеп беркетеү. *Нигеҙ ташы һалыу.* ■ *Төнгө смена, электр аҫтында эшләйҙәр. Кирбес һалып, улар кымырйыуын карап торҙом башта ситтәрәк.* Ғ. Сәләм./ Билдәле бер рәүешкә килтереп өйөп яһау (бесән, һаламды һ. б.) *Кәбән һалыу.* ■ *Сәгиҙә һаман да күлтәләрҙе йүгертеп йөрөп, ҙуратка һала ине.* М. Тажи. *Кайһыларыбыҙ күлтә ташый, кайһыларыбыҙ ашлык һуға, беҙ Ушанов менән эҫкерт һалдык.* Ғ. Минһажев.

**6.** Ниндәйҙер бер билдә, тамға һ. б. ҡуйыу, яһау. *Билге һалыу. Инәү һалыу. Тамға һалыу.* ■ *Салауат менән Юлайҙы танау һәм колактарын кыркып алып, маңлайына кыҙҙырған тимер менән тамға һалып, каты язалағандан һуң, Балтик диңгеҙе буйына мәңгелеккә һөргөнгә ебәрәләр.* М. Ғималова, Ғ. Хөсәйенов. .. *Быға инде бер билге һалайым, тип, арыҫландың шунда телен телә батыр.* «Бабсаҡ менән Күсәк»./ Документҡа, рәсми ҡағыҙға һ. б. ҡултамға ҡуйыу йәки нимәләр яҙыу. *Ғаризаға резолюция һалыу. Имза һалыу. Култамға һалып биреү.*/ Ер өҫтөнән буйлатып үткәреү, яһау (юл, межа һ. б.). *Бураҙна һалыу. Межа һалыу. Юл һалыу.* ■ *Саңғы ярышы ауыр шарттарҙа үтте. Юл һалып алғас кына кар яуып, ел сығып китте.* Б. Аҡбирҙин.

**7.** Әҙерләп, бешерергә ҡуйыу (аш-һыуҙы). *Аш һалыу. Ит һалыу.* ■ *Зәлифә .. каҙан аҫтына яғып ебәреп, һалма һала.* Т. Хәйбуллин./ Икмәк кеүек ҡамыр аштарын бешереүгә, әҙерләүгә ҡарата. *Бәлеш һалыу. Икмәк һалыу.* ■ *Килен һыйыр һауа белмәй, килен бәлеш һала белмәй.* Т. Арслан.

**8.** Һауытҡа бүлеп ҡойоу (аш-һыуҙы). *Стаканға һөт һалыу. Тарелкаға аш һалыу. Аш һалып биреү. Аш һалып ашау. Ай, һай .. һары балды һалығыҙ, арыҫландай батырҙарҙың аркаһынан кағығыҙ!* (Халыҡ йырынан)./ Аш-һыуға нимәнелер өҫтәп ҡушыу, ҡатнаштырыу. *Ашка катык һалыу. Ашка тоҙ һалыу. Сәйгә шәкәр һалыу. Һөткә ойотко һалыу.* ■ *Поляк катыны .. үт ягыша, ашка һыу һалғанда, тоҙ һалғанда беҙгә кәңәштәр бирә.* Д. Юлтый. *[Мәсем хан:] Шүлгән асыуы шул минә: ыу һалғайным күленә, камышына үрт һалып, хас кылғайным иленә.* «Аҡбуҙат»./ Ашамлыҡты алдына ҡуйып биреү, һибеү, ташлау (мал, ҡош-ҡорттарға ҡарата). *Малға бесән һалыу. Атка һоло һалыу. Тауыкка ем һалыу.* ■ *Крәҫтиәндәр .. аттарының ауыҙлыктарын һалдылар, аркалыктарын төшөрәләр, ат алдына аҙ ғына бесән һалалар.* С. Агиш.

**9.** Аулау, тотоу, эләктереү өсөн ҡороп ҡуйыу (ау, ҡапҡан, ҡармаҡты). *Бурегә капкан һалыу. Куянга тоҙак һалыу.* ■ *Йәй көнө Иректең яраткан эше балык тотоу, кармак һалып, көндәр буйына йылға ярында ултырыу.* З. Биишева. *Капкан ғына һалдым ай күк боҙға кама йәнлек менән кондоҙға* (Халыҡ йырынан).

**10.** Бәйләп, быуып, бикләп йәки башҡаса беркетеп ҡуйыу (тышау, быгау, еп, бәй, йоҙаҡты һ. б.). *Аяк-кулга быгау һалыу. Атка тышау һалыу. Ишеккә бик һалыу.* ■ *Өйҙә Әхмәҙиҙең бәләкәй кыҙҙары ишеккә келә һалдылар ҙа йокланылар.* Ж. Кейекбаев. *Ике малай ак һа-*

*рыктың муйынына еп һалып, һөрмәкләтеп алып килеп, лапаҫ аҫтына бағанаға бәйләнеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**11.** Дауалау, төҙәтеү маҡсатында тәндең бер ерен нимә менәндер беркетеп ныҡытып ҡуйыу. *Һынған ергә жгут һалып бәйләү.* ■ *Ул тиҙерәк торорға, сафҡа баҫырға ашҡына. Тик ашҡыныу иртәрәк була; Хәсәнде яңынан гипсҡа һалалар. Йәнә ике ай үтә. Ул койкала ултыра башлай.* Ғ. Ноғоманов.

**12.** Боронғо йола буйынса, дауалау маҡсатында бөтә тәнде йәки аяҡ-ҡулды һ. б. нимәнеңдер эсенә ҡуйыу. *Ауырыуҙы ҡырмыҫҡа иләүенә һалыу. Ауырыуҙы уҫаҡ япрағына һалыу. Ауырыуҙы тирегә һалыу.* ■ *Айбулат .. Муйылды тирегә һалыуҙың юҡҡа маташыу икәнлеге тураһында әбейгә аңлатыуҙын файҙаһыҙ булырына ышанһа ла уны үпкәләтмәне.* Һ. Дәүләтшина.

**13.** Дауалау һ. б. маҡсат менән тәнгә индереү, ебәреү, тамыҙыу йәки һалыу. *Күҙгә дарыу һалыу. Яраға дарыу һалып бәйләү.*

**14.** Һөлөк, банка һымаҡ нәмәләрҙе һурҙырып дауалау өсөн тәнгә ҡуйыу. *Мейестең үр яҡ эргәһендә картты арҡаһы менән яҡтыға ҡаратып ултыртып, Барсын әбей уның бөтә биленә буйлатып һөлөк һалды.* Һ. Дәүләтшина.

**15.** Билдәле бер маҡсатта берәй ойошмаға, халыҡҡа хөкүмәт йәһәтенән һалым, яһаҡ һ. б. билдәләү һәм шуға мәжбүр итеү. *Һалым һалыу. Штраф һалыу.* ■ *Яңы хөкүмәт .. мөлкәтле синыфтарға .. налогтар һалыу буйынса ҡырҡа политика үткәрә.* Һ. Дәүләтшина. / Килешеү буйынса хаҡ, түләм тәғәйенләү (туй йолаһы буйынса). *Мәһәр һалыу.* ■ *Ҡоҙаның беҙ һалған мәһәр, ҡалым, туйға күнеп тә мәһәрҙең илле һумын күтәрөүе генә күңелгә оҡшап бөтмәй.* Һ. Дәүләтшина./ Берәй тантанаға арнап, ниндәйҙер бүләк биреү, тапшырыу. *Бүләккә аҡса һалыу. Аҡса һалып ҡотлау. Туйға бүләк һалыу.*

**16.** Ситкә нимәнелер почта аша ебәреү. *Аҡса һалыу. Посылка һалыу. Хат һалыу.* ■ *Хаттар ғына һалһаң, һал заказной, заказной ҙа хаттар тиҙ урай* (Халыҡ йырынан).

**17.** Һыуыҡтан, ҡоротҡостарҙан һ. б. һаҡлау маҡсатында тирә-йүнгә, ер-һыуға таратыу (төтөн, дарыу, ыҫты һ. б.) *Төтөнлөк һалыу. Ыҫ һалыу.* ■ *Сәй яныңдағылар ел үренә төтөнлөк һалып, уларҙан [серәкәйҙәрҙән] аҙыраҡ ҡотолоп ултырҙылар.* Һ. Дәүләтшина./ Яндырыу, янғын яһау. *Ут һалыу. Үрт һалыу.* ■ *Ул ауылды әбей батшаның ғәскәрҙәре үрт һалып, көлөн күккә осороп киткәндәр.* З. Биишева. *Һәр кем башбаштаҡ ҡылып, үҙ белдеге менән ағас ҡырҡа, үрт һалып, урманды яндыралар.* М. Тажи.

**18.** Пар сығарыу йәки көсәйтеү өсөн мунса мейесенә һыу һибеү. *Эҫе һалыу. Эҫе һалып сабыныу.*

**19.** Өҫ-башҡа, аяҡ-ҡулға кейгән кейемде, таҡҡан нәмәне сисеү. *Кейемде һалыу. Күлдәкте һалыу. Кәпәсте һалыу. Итекте һалыу. Сәғәтте һалыу. Өҫтө һалыу.* ■ *Үҙ сменабыҙҙы бөтөрөп, арлы-бирле иткәс тә өҫтәге онға буялып бөткән халатты һалып ташланым.* Т. Йәнәби. *Мин ырымдарға ышанмайым, шулай ҙа күлдәкте һалғы килмәй, сөнки ул .. бүләк.* И. Ғиззәтуллин./ Хайуандың йүгән, тышау, ҡамыт һымаҡ нәмәләрен ысҡындырып ташлау, шуларҙан арындырыу. *Аттың ҡамытын һалып алыу. Аттың тышауын һалып ебәреү. Быҙауҙың муйынсағын һалыу.*

**20.** Ваҡытынан алда үле көйө тыуҙырыу (хайуандарға ҡарата). *Быҙау һалыу. Бәрән һалыу. Ҡолон һалыу.* ■ *Ерән бейә мантыма́ны, ҡолон һалды, быуындары төҙәймәй, әллә нисек, кәп-кәкре булып ҡалды.* Ә. Вахитов./ Балалағандан һуң бала ятҡылығын төшөрөү (хайуандарға ҡарата). *Сыуын һалыу. Һыйыр сыуын һалғансы ҡарап тороғоҙ, ашап ҡуймаһын.*

**21.** Тәбиғи үҫеш процесында ҡамасаулаған нәмәне ташлау, төшөрөү (болан, йылан, ҡарышлауыҡ һ. б. шундай йән эйәләренә ҡарата). *Йылан ҡауын һала. Ғинуарҙа мышы мөгөҙөн һала.*

**22.** Иғтибар менән ҡабул итеү, үҙендә һаҡлау (һүҙ, кәңәш һ. б. ҡарата). *Күңелгә һалып ҡуйыу. Әйткән һүҙҙәрҙе йөрәккә һалыу.* ■ *Был һүҙҙәрҙе онотма, күңелеңә һал.* М. Ғафури. *Вәғәҙәне йөрәгемә һалдым да эшемә тотондом.* Ш. Насыров.

**23.** Кешелә ниндәйҙер тойғо уятыу (дәрт, илһам, мөхәббәт һ. б. ҡарата). *Йөрәккә дәрт һалыу. Күңелгә шом һалыу. Күңелгә моң һалыу.* ■ *.. Обоз аттарының бышҡырыуҙары, үлем хырылдауҙары кеүек, күңелгә шом һалалар.* Д. Юлтый. *Көсөгөҙҙө иман итеп, мин бағындым, йөрәгемә мөхәббәт һал, матур һындар.* Ш. Бабич. / Кешене ниндәйҙер ауыр кисерешкә дусар итеү (ҡайғы-хәсрәт һ. б. ҡарата). *Ҡайғыға һалыу. Хәсрәткә һалыу. Ҡурҡыуға һалыу.* ■ *Бабсаҡ батыр Мәсем ханға килде инде, .. афәт һалған йыртҡысты үлтерҙем тип .. барын һөйләп бирҙе инде.* «Бабсаҡ менән Күсәк»./ Берәй төрлө эш-хеҙмәтте һ. б. башҡарыуға бөтә мөмкинлекте биреү, шуға сарыф итеү. *Дәрт һалыу. Ғәйрәт-көс һалыу. Иғтибар һалыу. Күңел һалыу.* ■ *Ул һөнәрсе үҙенең эшенә бөтә йәнен, йөрәген һалып эшләй..* З. Биишева *[Мораҙым:] .. Йөрәгемдә күпме дәрт, күпме шатлыҡ, күпме ғәйрәт бар-бөтәһен дә һалдым бейеүемә.* Ғ. Әмири./ Таратыу, сығарыу, барлыҡҡа килтереү (оран, ҡотҡо, йәүкә һ. б. ҡарата). *Йәүкә һалыу. Ҡотҡо һалыу. Һөрән һалыу. Яу ораны һалды Ватан, ат атланды батырҙар.* Р. Ниғмәти.

**24.** Билдәле бер тәртипкә, ыңғайына килтереү (эш-хәл, тормошто). *Донъяны яйға һалыу. Тормошто рәткә һалыу.* ■ *Дәүләт индивидуаль хеҙмәт эшмәкәрлеген яйға һала, уны йәмғиәт мәнфәғәтендә файҙаланыуҙы тәьмин итә.* «Башҡорт АССР-ының Конституцияһы», 1984.

**25.** Көйгә яраҡлаштырыу, көй менән башҡарырлыҡ итеү (йырҙы, шиғырҙы). *Шиғырҙы көйгә һалыу.* ■ *Йырға һалам йәшлегемдең һағыштарын, шатлығын.* Т. Ҡарамышева.

**26.** Күрәҙәлек итеү маҡсатында кәрт, ноҡот һ. б. нәмәләрҙе билдәле тәртиптә төрләсә теҙеү. *Кәрт һалыу. Ноҡот һалыу.* ■ *Кеше таш һалып ҡараған, таштар алдаған уны. Кеше кәрт һалып юраған, кәрт тә асмаған юлды.* Р. Ниғмәти.

**27.** *күсм. һөйл.* Нимәнеңдер иҫәбен сығарғанда билдәле бер система бәрәмегенә күсереп иҫәпләү. *Сакрымга һалып иҫәпләү. Метрга һалып үлсәү.* ■ *Арыштың төшөмөн гектар башына һалып караған юк.* М. Тажи.

**28.** *күсм. һөйл.* Һелтәнеп һуғыу, бәреү. *Һалып йығыу. Һалып ебәреү.* ■ *Ниғмәтулла кыҙы төштө һәм: Тағы ла каршы яуаплашаһың! — тип .. Сәрүиҙе һалып та ебәрҙе.* М. Ғафури.

**29.** *күсм. һөйл.* Иҫерткес нәмә эсеү. *Һалып алыу. Күп һалған.* ■ *[Петр Ивановичтың] кеткелдәп көлөүе юлга сығыр алдынан бер аҙ һалғанын, кыҙмаса икәнен белдереп тора ине.* А. Таһиров.

**30.** Хәл кылымдың *-а / -й* формаһынан һуң килеп, эш-хәрәкәттең тиҙ башкарылғанын белдерә. *Ашай һалыу. Китә һалыу. Кайта һалыу. Тора һалыу. Әйтә һалыу.* ■ *Гөлбаҙыян инәй тиҙ генә һыу йылыта һалды.* Ғ. Шәрипов.

**31.** Хәл кылымдың *-п* формаһынан һуң килеп, эш-хәрәкәттең капыл, киҫкен башкарылғанын белдерә. *Әйтеп һалыу. Һүтеп һалыу.* ■ *Башка эшселәр ҙә сығып, администрацияны, профсоюзды тетеп һалды.* Х. Мохтар.

◆ **Айбар һалыу** *кар.* **айбар. Баш һалыу** *кар.* **баш. Күҙ һалыу** *кар.* **күҙ. Кул һалыу** *кар.* **кул. Урын һалыу** *кар.* **урын** 10.

● *Бирәм тигән колона сығарып һалыр юлына.* Әйтем. *Бүре балаһын бүреккә һалһаң да урманга карай.* Мәкәл.

**ҺАЛЫУ** [2] *и.* Рәтләп йөрөгән йоғошло ауырыу; киҙеү. *Һалыу бар. Һалыу тейеү.*

**ҺАЛЫУ** [3] *и.* Кышкы юлдың кырын киткән урыны; кәйелтмәк. *Һалыуга төшөү.*

**ҺАЛЫУЛАТЫУ** *к.* Юлдың һалыу [3] урынында бер якка кыйшайып китеү, кәйелеү (санаға карата). *Йөрөйҙәр сана егеп, һалыулатып, һалкындан ирендәрен калтыратып.* М. Ғафури.

**ҺАЛЫУЛАУ** *к.* **1.** һалыу [2] менән ауырыу. *Һалыулап торам.*

**2.** Һалыу, ауыш урында кыйшайып китеү, кәйелеү (санаға карата). *[Сәрби — Йосопка:] — Теге ит букәне .. Әнүәр толопка төрөнгән. Ул йүнләп ултыра ла алмаҫ әле. Бер һалыулаған урында ауҙарып ал һин уны.* С. Агиш. *Мансафтың машинаһы кыш көнө тимерһеҙ сана һалыулаған төҫлө әле бер якка ташланды, әле икенсе якка осто.* Ә. Вәли.

**ҺАЛЫУЛЫ** *с.* Һалыуы [3] булған, ауыш, кейелтмәк. *Һалыулы юл.* ■ *Ат йүгертә һалмак кына һалыулы юлдар буйлап, сана кыйшайһа, ауһа ла һалыуһыҙ кайта уйҙар.* Н. Нәжми.

**ҺАЛЫУЛЫ: ауыҙы һалыулы** кешенең ашап-эскән вакытына тура килеп йөрөгән, ашаған вакытка тап килеп торған кешегә карата әйтелә. *Ауыҙы һалыулы булыу.* ■ *Атла, улым .. Алдыбыҙҙа башкорт ауылы. Башкорттар ул катык бирәләр, йә эремсек — ауыҙ һалыулы!* Т. Килмөхәмәтов.

● *Һалыулы ауыҙ һаклағаныңды ейә.* Әйтем.

**ҺАЛЫШЫУ** *к.* **1.** *урт. кар.* **һалыу** [1] 2, 4—17, 24—26. *Йорт һалышыу. Атка тышау һалышыу. Ауырыуҙы больницаға һалышыу. Аш һалышыу. Икмәк һалышыу. Йорт һалышыу. Кирбес һалышыу. Кәбән һалышыу. Куянга тоҙак һалышыу. Малга бесән һалышыу. Мейес һалышыу. Өйгә бик һалышыу. Посылка һалышыу. Төтөнлөк һалышыу. Юл һалышыу.*

**2.** Нимәгәлер нык бирелеү. *Ашауга һалышыу. Йокоға һалышыу.* ■ *Һалдатта хеҙмәт иткәндә шиғыр яҙыуға һалыштым да киттем.* Н. Мусин. *Ҙур кайғы тиҙҙән икенсе бәлә килтерҙе. Егет эскелеккә һалышты.* Д. Исламов.

**3.** Үҙең эшләмәй, ниндәйҙер бер эште кешенән эшләтергә тырышыу, кешегә ауҙарыу. *Бер беренә һалышыу. Ата-әсәгә һалышыу. Кешегә һалышыу.* ■ *Беҙҙең якта егет кеше кешегә һалышмай тигән бер һүҙ бар.* Ә. Вәли. *Өләсәйгә һалышып өйрәнгән ул малай әҙергә.* А. Игебаев.

**4.** Үҙеңде юрамал бер хәлгә йәки бер сифатка куйыу. *Ауырыуга һалышыу. Белмәмешкә һалышыу. Ишетмәмешкә һалышыу. Хәйләгә һалышыу.* ▭ *Хәйләкәр катын .. ирен әҙерәк булһа ла йыуатырга тырышып, вайымһыҙга һалышты.* Б. Бикбай.

**ҺАМАЙ** *и.* Баш һөйәгендә колак өҫтө тәңгәленән кашка тиклемге ара; сикә. **Һамай сәсе** ике як һамай тәңгәлендә үҫкән сәстәр. *Ашыға-ашыға атлай кыҙ елберләй таңғы елдәрҙә һамай сәстәре.* К. Кинйәбулатова. *Килен алырга килгән коҙағыйҙың ике һамайы һеркәле* (Сеңләүҙән).

**ҺАМАЙЛАУ: һамайлап үреү** сәсте маңлайҙан түбән һамайҙан башлап уратып үреү. *Бәләкәй кыҙҙарҙың сәсен һамайлап үрәләр.*

**ҺАМАК** *и.* Көйләп әйтелгән шиғри һүҙ. *Һамак әйтеү.* ■ *Барсынһылыу атаһы менән әсәһенә килеп, илап һамак әйткән, ти: «Куйсы, атай, куйсы атай, кыҙыңа йомшак булсы, атай. Өйөңә кейәү алып килдем, тороп кулың бирсе, атай, улың итеп күрсе, атай».* «Алпамыша».

**ҺАМАКЛАУ** *к.* Һамак итеп әйтеү, һамак әйтеү. *Заятүләк һыу кыҙын ебәрмәй. Уга һамаклап ошолай ти: «Нык тоткаммын сәсеңде, аҫыуланма, һылыу кыҙ. Түкмә юкка йәшеңде, ебәрмәйем, һылыу кыҙ!»* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ҺАМАН** [*фарс.*], **һаман да** *р.* Ошо вакытка тиклем, ошоға кәҙәр. *Һәүбән һаман үҙенең Уралын, .. һылыу кыҙҙарын һағына.* «Акбуҙат». *[Хан:] Күпме вакыт үтте, ирең һаман юк та юк. Иҫән булһа, кайтыр ине инде* (Әкиәттән).

**ҺАМАНА** [*фарс.*] *р. иҫк. кит.* Ошо вакыт, ошо мәл. *Былар [ер һағыусылар] ихласла кәсебен итәрләр, .. һамана аглайыу китәр эшенә* (Бәйеттән).

**ҺАМАР** *и. диал.* **1.** Тоткалы ағас һауыт. *Һамарга икмәк әсетеү.*

**2.** *кар.* **ашлау** [1].

**ҺАМАТАЙ** *с. диал.* Иҫһеҙ, аңра.

**ҺАМҪЫТЫУ** *к.* Арытыу, йонсотоу. *Һамҫытып бөтөрөү.*

**ҺАМҪЫУ** *к. диал.* Нык арыу, йонсоу. *Ул бала сәйәхәт итеп йөрөп, бик һамҫыған, ябыккан.* Ж. Кейекбаев.

**ҺАМТЫК** *и. диал.* Һаркыт.

**ҺАМТЫРАУ** *к. диал.* Әлһерәү, хәлһеҙләнеү.

**ҺАН** [1] *и.* **1.** Кемдең йәки нимәнеңдер бәрәмекле иҫәбе. *Халык һаны. Малдың баш һаны. Нәмәнең һанына сығыу.* ■ *Күктә йондоҙҙар һаны күбәйҙе.* С. Агиш. / Ниҙеңдер иҫәпләрлек күлә-

ме; дәүмәл. *Хеҙмәт һаны. Һан артынан ҡыуыу.* / Кемдең йәки ниҙендер иҫәбенә ингән өлөш. *Әсә һөтөн имеп туймаған бәхетһеҙҙәр һанынан бе-рәүмен.* Ғ. Амантай. / Рәт иҫәбе менән билдә-ләнгән нәмә. *Журналдың тәүге һаны.*

**2.** *мат.* Берәмәкле иҫәп миҡдарын белдергән төшөнсә. *Аралаш һандар. Йөп һан. Таҡ һан.*

**3.** Шул төшөнсәне аңлатҡан билдә. *Хаят йөҙгә тиклем булған һандарҙы яңылыша-яңылыша уҡып бирҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** *грам.* Нәмәне иҫәп яғынан аныҡлаған һүҙ төркөмө. *Ябай һандар. Ҡушма һандар. Төп һандар. Рәт һандары.*

**5.** *лингв.* Йәнле һәм йәнһеҙ нәмәләрҙең берле-ген һәм күплеген морфологик юл менән белдер-гән грамматик категория. *Берлек һаны. Күплек һаны.*

♦ **Ни һан** бик күп. *Күп эшләнең бөгөн, ни һан сиҙәм аҡтарҙың.* Ш. Янбаев. **Һаны юҡ** иҫәп-һеҙ, бик күп. *Күл ягаһы күк тирәк, күк тирәктең һаны юҡ* (Ҡобайырҙан).

**ҺАН** [2] *и.* Тейешле баһа, ихтирам, иғтибар. *Һан юҡ. Юҡҡа һан.* ■ *[Рәхимә:] Күҙгә ҡарап то-роп миңә һүҙ әйтәһең, башҡаһына ни һан.* Һ. Дәү-ләтшина. *Аргымаҡ яңғыҙ, егет малһыҙ, малһыҙ егет була шул һанһыҙ* (Халыҡ йырынан).

♦ **Иҫәпкә бар, һанға юҡ** *иғтибарға алырлыҡ түгел тигән мәғәнәлә әйтелә.* **Олоға һан** *ҡар.* **оло. Һанға алыу** (*йәки* **һанау, һуғыу**) иғтибарға алыу, һанлау. *Ғимазетдин бай ҙа харап ҡанһыҙ була торғайны. Кешене көсөк һанына ла һана-маны.* Я. Вәлиев. *Мин сикһеҙ хөрмәт итәмен халҡымдың телен, ә кем уны һанға һуҡмай — хурлай тик үҙен!* Б. Бикбай. *Олоға ҡолаҡ һал-мау — яманлыҡтың билдәһе, кесене һанға ал-мау — насарлыҡтың билдәһе* (Ҡобайырҙан).

**ҺАН** [3] *и.* Кеше һәм ҡайһы бер йәнлектәрҙең кәүҙәһенең бер өлөшө. *Ал һан. Арт һан.* ■ *Эт арт һанын күтәрә алмай ине.* Р. Низамов.

♦ **Дүрт һан** 1) кешенең аяҡ-ҡулдары. *Дүрт һаны теүәл;* 2) мыҡты кәүҙәле, ныҡ. *Дүрт һан кеше. Дүрт һан булыу.*

**ҺАНАЙ** *и.,* **һанай ян** Ябай ян. *Ҡырҡар-илле-шәр тинлек һанай йәйәләребеҙ ялан башҡортта-рының унар-егермешәр һумлыҡ әҙернә йәйәлә-ренән артыҡтыр.* «Батыршаның хаты».

**ҺАНАЛЫУ** [1] *ҡ. төш. ҡар.* **һанау** [1]. *Һаналған мал.*

**ҺАНАЛЫУ** [2] *ҡ. төш. ҡар.* **һанау** [2]. *Ҡәҙерле һаналыу.*

**ҺАНАТ** *и.* Батша эргәһендәге юғары вазифалы кеше; вәзир. *Батша һанаттары.* ■ *Таҙ үҙе батша булып алды, ә теге батша уның баш һанаты булып ҡалды, ти* (Әкиәттән).

**ҺАНАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **һанау** [1]. *Аҡса һа-натыу.*

**ҺАНАУ** [1] *ҡ.* **1.** Һандарҙы үҙ тәртибе менән әйтеү. *Йөҙгә ҡәҙәр һанау. Һанай белеү. Һанарға өйрәтеү.*

**2.** Берәмеклэп ниҙеңдер иҫәбен сығарыу; хи-саплау. *Аҡса һанау.* ■ *Ике батыр гәжәпһенеп ҡарап торҙо .. ҡанса әҙәм бар икәнен һанап тор-ҙо.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**3.** Нисектер баһалау, ниндәйҙер баһа менән ҡарау. *Аҡыллыға һанау. Барға һанау. Бәхеткә һанау. Ғәрлек һанау. Дуҫ һанау. Кешегә һанау.* ■ *Йәш батша ҡара икмәк менән картуфты ашҡа һанамаған өсөн батша булып оҙаҡ ултыра алма-ны, ти* (Әкиәттән).

♦ **Ҡабырғаны һанау** *ҡар.* **ҡабырға. Һанап бөткөһөҙ** бик күп.

**ҺАНАУ** [2] *с. диал.* Аңра. *Һанау кеше.*

**ҺАНАУЛЫ** *с.* **1.** Иҫәбе алынған, иҫәбе, һаны билдәле. *Һанаулы аҡса. Һанаулы көн.*

**2.** *күсм.* Һанға әҙ, күп түгел; иҫәпле. *Һанаулы минуттар. Яңы уҡыу йылы башланыуға һанау-лы ғына көндәр ҡалды.*

**ҺАНАУҺЫҘ** *с.* Иҫәбенә сыҡҡыһыҙ; иҫәпһеҙ, күп. *Һанауһыҙ мал.*

**ҺАНАШЫУ** *ҡ.* **1.** *урт. ҡар.* **һанау** [1].

**2.** Кемде, нимәне иҫәпкә алыу, уның менән хисаплашыу, иҫәпләшеү. *Ваҡыт менән һанаш-май, көн-төн эшләтеп, эшселәрҙең майҙарын һығалар.* Т. Хәйбуллин.

**ҺАНДАЛ** [1] [*фарс.*] *с.* **1.** Үтә ныҡ сағыу ал төҫтәге. *Һандал күлдәк. Һандал таҫма. Һандал яулыҡ.*

**2.** *и. мәғ.* Шул төҫтәге кершән. *Ҡыҙҙар яңы күлдәктәрен кейеп, биттәренә һандал буяп кил-гәндәр.* Ж. Кейекбаев.

**ҺАНДАЛ** [2] *и.* Тимерлектә тимер сүкеү өсөн ҡулланылған ҙур түш. *Һандалға һалыу. Һандал-да сүкеү.* ■ *Хужа землянканың алыҫ мөйөшөн-дәге һандалда ҡыҙған тимерҙе йән асыуы менән сүкей ине.* Ә. Вәли.

**ҺАНДАЛ** [3] [*грек.*] *и.* Хуш еҫле майы булған мәңге йәшел тропик ағас. *Һандал ағасы. Һан-дал майы.*

**ҺАНДАЛЛАНЫУ** *ҡ.* Һандал [1] төҫкә инеү. *Ҡыҙҙарҙың алланып, һандалланып, күпереп то-ра ине йөҙҙәре.* Ш. Бабич.

**ҺАНДА-ҺАЯҠ** *р.* Әллә ниҙә бер; бик һирәк. *Һанда-һаяҡ осрау.*

**ҺАНДУҒАС** *и.* Барҡылдаҡтар ғаиләһенә ҡа-раған матур һайрай торған бәләкәй күсәр ҡош. *Һандуғас тауышы. Һандуғас моңо.* ■ *Сут-сут итеп талға баҫып, тал тибрәтеп, һайрай һары һандуғас.* Т. Йәнәби. *Төнгө тынлыҡ. Ағаслыҡта һандуғас моңо.* Салауат Юлаев.

**ҺАНДЫҒАЯҠ** *и.* Һандыҡ [1] йәки йыйыулы ҡаралды аҫтына ҡуйыла торған семәрле биҙәл-гән күтәрмә; һандыҡ аяғы. *Урындыҡтың бер яҡ башында һандығаяҡ өҫтөнә һандыҡ ултыртыл-ған.* Ш. Шәһәр.

**ҺАНДЫҠ** [1] [*гәр.*] *и.* Кейем-һалым һ. б. кәрәк-ле нәмәләрҙе һаҡлай торған ҡапҡаслы ҙур ҡум-та. *Тимер һандыҡ. Семәрле һандыҡ.* ■ *Түрҙә — ҡалайлы иҫке һандыҡ, уның өҫтөндә бер-ике башҡорт балаҫы, туҙып бөткән ҡораҡлы юрған.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҺАНДЫҠ** [2] *и.* Мал ашағандан ҡалған эре-торо бесән йәки һалам. *Әбделхаҡ аҙбарҙағы бесән һандығын, тиҙәктәрҙе утынлыҡҡа көрәп сығарып, ут төрттө.* Ж. Кейекбаев.

**ҺАНДЫҠЛАУ** *ҡ.* Һайлап ашап, ҡалғанын һандыҡҡа [2] әйләндереү. *Һандыҡлап ашау.*

**ҺАНДЫРАЙ** *и. ҡар.* **һандыраҡ.**

**ҺАНДЫРАҠ** *и.* Һандыраған, ҡаңғырған кеше; һандырай. *[Ҡарамырҙа:] Әй өйөрлө алйот, һан-дыраҡ!* Х. Ғәбитов.

**ҺАНДЫРАУ** *к.* Ни эшләргә белмәй аптырау; ҡаңғырыуы. / Ҡаңғырып, аптырап теләһә нәмә, юҡ-барҙы һөйләү. *Һандырап йөрөү. Юҡты һандырама.*

**ҺАНДЫРЛАУ** *к.* Бытырлап, күп һөйләү. *[Әбей:] Бабай, үҙең генә һандырлама, кешегә лә һөйләргә хут бир.* Ш. Янбаев.

**ҺАНЛАНЫУ** *к.* Иҫәпләнеү, һаналыу. *Олоға һанланыу.*

**ҺАНЛАУ** *к.* Тейешле баһаға ҡуйыу; иҫәпкә, һанға алыу. *Ҡомартҡыларын һанларҙай кеше килһә, йәшәй ҙә китә ул Хасбулат апам.* З. Биишева. *Һанлаһағыҙ әгәр, дуҫтар, мине, зинһар инде, бәғзе бәләләрҙән һаҡлағыҙ.* Й. Солтанов.

**ҺАНТЫЙ** *с. диал.* Алйот, иҫәр.

**ҺАНТЫР** *с. диал.* Алйот, иҫәр.

**ҺАНУҘ** [*фарс.*] *р. иҫк.* Һаман. *Ҡоштар ишле-ишле, ә мин генә һануҙ яңғыҙым.* М. Тажи.

**ҺАНҺЫҘ** [1] *с.* Һанап бөтөргөһөҙ; иҫәпһеҙ; күп. *Һанһыҙ мал.* ■ *Булған илдең батыр улдары .. Ғүмер буйы йөрөп яуҙарҙа, йыйған улар һанһыҙ дуҫтарҙы.* Салауат Юлаев.

**ҺАНҺЫҘ** [2] *с.* Иҫәпкә, һанға алырлыҡ түгел; баһаһы юҡ, ҡәҙерһеҙ. *Һанһыҙ булыу.*

● *Унһыҙ донъя һанһыҙ.* Әйтем.

**ҺАНҺЫНЫУ** *к.* Һанға, иҫәпкә алыу; һанлау. *Тине алла: «Ник миңә буйһонмайһың? Был ҡәҙәр дәүләтте ни һанһынмайһың?»* Ш. Бабич.

**ҺАНҺЫРАУ** *к. диал.* Һандырыу.

**ҺАНЪЯУ** *с. диал.* Алйот, иҫәр.

**ҺАНЪЯУЛАНЫУ** *к. диал.* Алйотлаиыу, иҫәрләнеү. *Һанъяуланып йөрөү.*

**ҺАҢАҠ** *и. диал. ҡар.* **һағаҡ** [1]. *Балта һаңағы.*

**ҺАҢҒАУ** *и.* Ҡайһы бер ҡош, йәнлектең ашҡаҙандан кире сығарып, бәләкәй балаһына ашатҡан аҙығы. *Ҡарсығам һаңғауын һалалмай үлеп ҡалды.* М. Ҡулаев.

**ҺАҢҒЫРАУ** *с.* **1.** Ишетеү һәләте юҡ йәки кәм. *Һаңғырау кеше. Һаңғырау ҡолаҡ. Һаңғырау булыу.*

**2.** Асыҡ түгел, тоноҡ яңғыраған. *Алыҫта ярылған туптарҙың һаңғырау тауыштары киске тынлыҡ менән яҡын кеүек ишетелә.* Д. Юлтый.

**3.** *лингв.* Тауыш ҡатнашмай шау ярҙамында яһалған. *Һаңғырау тартынҡылар.*

● *Һаңғырауға сәләм бирһәң, атаң башы, тип әйтер.* Мәҡәл.

**ҺАҢҒЫРАУЛАНДЫРЫУ** *к.* Һаңғырау (1 мәғ.) итеү, һаңғырауға әйләндереү.

**ҺАҢҒЫРАУЛАНЫУ** *к.* Һаңғырау (1 мәғ.) булыу, һаңғырауға әйләнеү. *Ҡолаҡ ағыу оҙаҡ ваҡыттар һуҙылһа, кешенең һаңғырауланып ҡалыуы мөмкин.*

**ҺАҢҠЫТЫУ** *к.* Еҫ таратыу, аңҡытыу. *Ер йөҙөндә төрлө сәскә төрлө еҫтәр һаңҡытыр.* Х. Ғәбитов.

**ҺАҢҠЫУ** *к. диал.* Анҡыу. *Еҫ һаңҡый.*

**ҺАП** [1] *и.* Эш ҡоралдарының тотоу өсөн ҡулайлаштырылған өлөшө. *Балта һабы. Бысаҡ һабы. Ҡамсы һабы. Ҡылыс һабы. Салғы һабы. Һап ҡуйыу.* ■ *Ҡарт арбаға менеп ултырҙы ла сыбыртҡы һабы менән бер ослоҡай тауға төртөп күрһәтте: — Анауы тауҙы күрәһеңме, ҡыҙым?* М. Тажи. *Көмөш кенә ҡашыҡ, һабы нәҙек, тотмаһана — ҡулың бешерер* (Халыҡ йырынан).

◆ **һапһыҙ ҡара балта** эште ныҡ эшләгән, тормошта эштән башҡа бер ни белмәгән, эш менән баҫылған кешегә ҡарата әйтелә. *Зәлифә ул туй ҙа күрмәй, аш та күрмәй, ул тик һапһыҙ ҡара балта, тик эшләүҙе генә белә.* Т. Хәйбуллин.

● *Балта һабы беләктән башлана, үткәрлеге йөрәктән.* Әйтем. *Ҡатыным үлде — ҡамсымдың һабы һынды.* Әйтем. *Һабы тура килһә — йәбе килмәй; йәбе килһә — һабы килмәй.* Әйтем.

**ҺАП** [2] *ымл.* Нимәнелер күтәргән йәки тартҡанда көс биреү өсөн әйтелә.— *Шәмсиҙе төшөрөгөҙ бейеһен! — тине нәҙек тауыш менән Һәжәр. — Һап, һап! — тип ярҙамлаша башҡалар.* Ғ. Хәйри.

◆ **һап итеп тороу** нимәлер эшләргә әҙер булып, һикереп сығып тороу. *[Иҙел:] Атҡа ултырып фәлән ергә барып ҡайт, тиһәң, ул [Сәлимә] һап итеп торор ине.* Ш. Насыров.

**ҺАП-** *к.* **һа**-*ға* ижеге менән башланған сифат һәм рәүешкә ҡушылып, уның мәғәнәһен көсәйтә. *Һап-һай. Һап-һары. Һап-һау.* ■ *[Әскәп:] Әй, меҫкенкәй, бигерәк әрәм булған, әле иртәнсәк һап-һау кеше ине.* М. Ғафури. *Ҡамыш араһынан сипылдашып, ваҡ ҡына һап-һары өйрәк бәпкәләре сыға башланы.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҺАПА** *и.* Баҫалҡы холоҡ, эш, тормоштағы әҙәп-тәртип. *Һапа булыу.*

● *Аҡ һөттөң апаһы — һауынсының һапаһы.* Әйтем.

**ҺАПАЛЫ** *с.* Эш, тормош тәртибен белгән, баҫалҡы холоҡло, әҙәпле, тәртипле. *Һапалы кеше. Һапалы булыу.* // *Ҡыҙ балаларҙай, һапалы ғына ултырғаны, шәкәрен кетерләтеп, сәйен сынаяҡ аҫтынан аҙлап ҡына уртлап эскәне Хәбир булыр.* В. Нафиков.

**ҺАПАТА** *с.* Булдыҡһыҙ, әрпеш. *Һапата ҡатын.*

**ҺАПҠЫН** *и.* Ташты атып бәрә торған уртаһы тоҡанлы оҙон бау. *Бикйән һапҡын менән бәреп өс һуйыр алды.* «Бикйән мәргән».

**ҺАПЛАМ:** **һаплам еп** энәгә бер һабаҡларға етәрлек еп. *Әсәйемдең ҡулдәк иҙеүендәге һаплам еп үткәрелгән энәһе беҙ йыртҡан кейемдәрҙе бөтәйтергә, ямарға һәр ваҡыт әҙер генә була ине.* Ш. Янбаев.

**ҺАПЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **һаплау.** *Һапланған балта.*

**ҺАПЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **һаплау.** *Көрәк һаплатыу. Тырма һаплатыу.*

**ҺАПЛАУ** *к.* **1.** Һап [1] ҡуйып, һаплы итеү. *Салғы һаплау.* ■ *Ҡара урман эсендә ҡамсы һаплай алманыҡ.* Ғ. Сәләм.

**2.** *диал.* Һабаҡлау. *Энә һаплау.*

◆ **Ҡырынға һаплау** *шул уҡ* **кирегә һаплау** (*ҡар.* **кире** [1]).

**ҺАПЛАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **һаплау 1**. *Балта һаплашыу.*

**ҺАПЛЫ** *с.* Һабы, тотҡаһы булған, һап ҡуйылған. *Һаплы балта. Көмөш һаплы хәнйәр. Һөйәк һаплы бәке.* ■ *Ғариф ағай .. кәкре һаплы йүкә сыбыртҡыһын билбау аҫтына ҡыҫтырып, ат ялына һырыған дегәнәктәрҙе сүпләп тора.* Б. Бикбай. *Көмөш кенә һаплы булат ҡылыс .. Ҡаһым түрә аҫҡан биленә* (Халыҡ йырынан).

**ҺАПМА** *и.* Сөлтәрҙең, һаҡалдың муйынға элә торған тәңкәле бауы.

♦ **һапма ҡуҡ** селтәр өҫтөндәге ҡуҡ. **һапма иҙеү** *диал.* күкрәксә.

**ҺАПЫРЫУ** *ҡ.* Буҙа, ҡымыҙ һымаҡ эсемлектәрҙе, ҡайнап ултырған һурпаны, һөттө сүмес менән һоҫоп, үрҙән кире ҡойоп болғатыу. *Буҙаны һапырыу. Ҡымыҙҙы һапырыу.* ■ *[Миргәйшә] һапыра-һапыра касаларға ҡымыҙ ҡоя башланы.* С. Ҡудаш.

**ҺАР** [1] *и.* Ҡарсығалар ғаиләһенә ҡараған ҡарғанан ҙурыраҡ, ҡорһаҡ аҫты ҡара менән һор аралаш буй һыҙатлы, ҡыҫҡа, түңәрәк ҡойроҡло йыртҡыс ҡош (урманда, ағас башында оялай). *Һауаларҙан осҡан әй һар микән, аяҡайҙарын күргән бар микән* (Халыҡ йырынан).

**ҺАР** [2] *и.* һамаҡ рәүешендә еңел көй менән әйтелгән йыр. *Һар һарнау.*

**ҺАРА** *и.* Ҡуллама һалып табынға килтерә торған ҙур, оҙонса ағас һауыт.

**ҺАРАЙ** [1] [*фарс.*] *и.* **1.** Батшалар, хандар, дәүләт башлыҡтары тора торған йорт. *Батша һарайы. Һарай баҡсаһы.* ■ *Хан ҡыҙҙары ҡайта торһон, Алпамыша ята торһон, беҙ Барсынһылыуға киләйек, Буләр хан һарайына инәйек.* «Алпамыша».

**2.** Махсус йәмәғәт ойошмаһы урынлашҡан ҙур бина. *Пионерҙар һарайы. Культура һарайы. Спорт һарайы.*

**ҺАРАЙ** [2] [*фарс.*] *и.* Мал-тыуар тора торған йорт ҡаралтыһы; кәртә, ҡура. *Ат һарайы. Мал һарайы. Һарай башы.* ■ *Егет .. айғырҙы һарайына алып ҡайтып, ябып ҡуйған* (Әкиәттән). *Һарайҙағы сыбар тай сыр-сыр кешнәй* (Әкиәттән).

**ҺАРАЙТА** *и.* Йоҡа ҡоростан яһалған боронғо яу кейеме.

**ҺАРАЛЙЫН** *и.* Ҡыҫҡа аяҡлы, оҙон суҡышлы, арҡаһы көрәнһыу буйлы, ҡорһағы аҡ төҫтә сыйырсыҡ ҙурлыҡ көйөлдөләр ғаиләһенә ҡараған һаҙ ҡошо. *Һауала төрлөсә ҡыланып һаралйындар оса.* Я. Хамматов.

**ҺАРАН** *с.* Үҙ нәмәһен кешегә бирергә ҡыҙғаныусан, үҙ нәмәһен ҡулдан ебәрмәҫкә тырышып тороусан, ҡаты; үтә һаҡсыл. *Һаран кеше. Һаран булыу.* ■ *[Юлдаш:] Ибраһим бабай һаран ул. Умарта ҡарағанда янына барһаң да бер ҡабым бал бирмәй.* З. Биишева.

♦ **һүҙгә һаран** әҙ һөйләүсән. *Һүҙгә һаран кеше.*

● *Һаранға һарылма.* Әйтем. *Һарандың ашы бешмәҫ.* Әйтем. *Һаран кешегә эт баҡмаҫ, төнлөгөнән ел ҡаҡмаҫ.* Әйтем.

**ҺАРАНАЙЫУ** *ҡ. ҡар.* **һаранланыу.**

**ҺАРАНЛАНЫУ** *ҡ.* Һаранға әйләнеү, һаран булыу; һаранайыу. *Һаранланып китеү.* ■ *[Нәркәс:] Һинән, атай, һорайым бер ҙә һаранланмаҫҡа. Егеткә бир Аҡбуҙҙы, Урал батыр ҡылысын.* «Аҡбуҙат».

**ҺАРАНЛАШЫУ** *ҡ. диал.* Һаранланыу.

**ҺАРАНЛЫҠ** *и.* Һаран кешегә хас сифат, һаран булған хәл. *Һаранлыҡ менән. Һаранлыҡ күрһәтеү.* ■ *Юламандың ҡатылығына, һаранлығына түҙмәй йәш егет әллә нисә рәт бынан китергә ынтылған. Тик Шәфәҡ ебәрмәгән уны [Шафиҡты].* Ә. Вахитов.

**ҺАРАПТАШ** *с. диал.* Әрпеш.

**ҺАРАУҺЫҘ** *с.* **1.** Әҙәп, тәртипте, оялыу, тартыныуҙы белмәгән әрһеҙ холоҡло; тупһыҙ. *Һарауһыҙ кеше.* ■ *Һарауһыҙ ҡыҫҡартыу һөҙөмтәһендә поэма тоҡос килеп сыҡҡан.* Р. Ниғмәти.

**2.** *диал.* Бәрәшән. *Һарауһыҙ булыу. Аҙыҡты һарауһыҙ тотоноу.*

● *Һарауһыҙ һаҡлағанды ҡуймаҫ, ҡарға ҡаҡлағанды ҡуймаҫ.* Мәҡәл.

**ҺАРАУЫС** *и. этн.* Ҡашмау аҫтынан маңлайға бәйләү өсөн ус аяһындай киңлектә, ҡарыш ярымдай оҙонлоҡта итеп, аҡ киндер ерлеккә ебәк менән сигеп яһаған биҙәнеү нәмәһе (туйҙа егет яғының ҡатын-ҡыҙына таратыла торған ҡыҙ бүләге итеп йөрөтөлә; һарауыс алған ҡатын-ҡыҙ тәңкә һала). *Нағыш күп булдымы — тимәк, ул өйҙөң килене йәки ҡыҙҙары уңған. Төрлөсә ҡайып эшләнгән һарауыс тиһеңме, таҫтар башы тиһеңме, төрлө балаҫ һәм башҡа биҙәмәләр тиһеңме — барыһын да табаһың.* К. Мәргән.

● *Һарауысты һанап бир, биҙәктәрен ҡарап бир.* Әйтем.

**ҺАРАУЫСЛАУ** *ҡ.* Тирмә кейеҙен һарауыс биҙәге һымаҡ итеп ебәк менән нағышлап сигеү. *Ҡоҙа-ҡоҙағый өсөн ебәк менән һарауыслап сиккән кейеҙ тирмәләр ҡорғандар.* Ғ. Ибраһимов.

**ҺАРАЯҠ: һараяҡ башмаҡ** ҡышты ҡышлаған көҙгө быҙау.

**ҺАРҒАЙТЫУ** *ҡ.* **1.** Һары төҫкә әйләндереү, һары итеү. *Япраҡты һарғайтып көҙ килә.*

**2.** Һары [2] (1 мәғ.) менән ауырыуға дусар итеү; һарыға һабыштырыу. *Бәхетемде кире ҡаҡтың, һарғайтыр өсөнмө, атаҡайым?* (Сеңләүҙән).

**ҺАРҒАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Һары төҫкә инеү, һары төҫ алыу. *Көҙгө көн. Япраҡ һарғая, ялангас ҡала ҡайын.* Р. Ниғмәти. *Һарғайып таң атҡанда, баҙлап ҡояш ҡалҡҡанда бабай ... күлгә балыҡҡа барған, ти* (Әкиәттән).

**2.** Һарыға [2] (2 мәғ.) һабышыу. *Ауырып та ятып һарғайманым, мин һарғайҙым һине һағынып* (Халыҡ йырынан).

**ҺАРҒАЙЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **һарғайыу.**

**ҺАРҒАУЫЛ** *и. этн.* Тирмә төнлөгөн яба торған оҙон ағас ҡорамал.

**ҺАРҒЫЛАУ** *с. диал.* Һарғылт.

**ҺАРҒЫЛТ** *с.* Әҙ генә һары, һары ҡатыш. *Һарғылт төҫ.* ■ *Арыштар ҙа баш ҡоҫҡан мәлендәге ҡарағусҡыл йәшелләктәрен юғалтып, һарғылт көкөрт төҫкә әйләнеп, ем йыйып ултыралар.* Ғ. Дәүләтшин. *Һандыҡ төбөндәге һарғылт хаттар, эленеп торған һарғылт һүрәттәр .. сабырлыҡҡа улар өйрәткән.* Р. Бикбаев.

**ҺАРҒЫЛТЛАНЫУ** *ҡ.* Һарғылт төҫкә инеү, һарғылт булыу. *Һарғылтлана төшкән япраҡтар ҡояштың киске нурҙарына мансылып, алтындай ялтырай.* С. Ҡудаш.

**ҺАРҠАУ: ҡара һарҡау** тиф ауырыуы, тиф.

**ҺАРҠАШ** *с. диал.* Ығыш.

**ҺАРҠЫЛЫУ** *ҡ. һөйл.* Нимәләр аша үтә һарҡып ([1] мәғ.) сығыу, һарҡып тороу.

**ҺАРҠЫНДЫ** *и.* **1.** Һарҡып сыҡҡан шыйыҡлыҡ. *Сәй һарҡындыһы. Бал һарҡындыһы. // Һарҡынды сәй. Һарҡынды һыу.* ■ *Ҡалын тимер менән ҡоршалған ҡырандас тәгәрмәстәре юлға йыйылған һарҡынды һыуҙы шыптырлатып кисеп үтә.* И. Ғиззәтуллин.

2. *кар.* төнәтмә 1.

**ҺАРҠЫРАУ** *к.* Һарҡып (һарҡыу [1] 1 мәғ.) сығып тороу, һарҡып ағыу, тамыу. *Һаркырап тороу.* ■ *Кыҙҙырылған, майы һаркырап торған тоҙлаған ит уның [Гәрәйҙең] ауыҙының һыуын килтерҙе.* Б. Бикбай.

**ҺАРҠЫТ** *и.* **1.** Аңнағандан ҡалған аҙыҡ, ҡалдыҡ аш. *[Тукмуйрык:] Кунак-төшөм вакытында ла калған һаркыт менән туйынаһын.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Һарҡытылған йәш ҡатыҡ; һөҙмә. *Куйылыгы каймактай, тәмлелеге һаркыттай һаба-һаба кымыҙы* (Ҡобайырҙан).

● *Эт һаркытын арыҫлан еймәҫ.* Әйтем.

**ҺАРҠЫТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **һарҡытыу.** *Ит туралғас, кәйнәм һаркытылган һалмаға итте һалды.* Т. Кусимова.

**ҺАРҠЫТЫУ** *к.* **1.** Әҙ-әҙ генә итеп ағыҙыу. *[Бай] шешәнән һаркытып кына койоп алып кымыҙ эсте.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Шыйығын иплән кенә ағыҙып, ҡуйыһын айырыу. *[Айбикә] эркет кутарып, уны токка койоп һаркытырға куйҙы.* Һ. Дәүләтшина. / Йыуған нәмәне һыуын ағыҙып ҡоротоу. *Хөббөниса йыуған кашаяғын һаркытырға куйҙы.* Я. Хамматов.

**ҺАРҠЫУ** [1] *к.* **1.** Әҙләп кенә йыйылып сығып ағып тороу. *Уҙе [Әлемголов] бик ябай кейенгән, ауыр кирза итектәренән иҙәнгә һыу һарка.* Р. Низамов. *Түбәләрҙән һаркып тамалар яҙҙың һуңғы тамсы һыуҙары.* Ғ. Амантай. / Әҙ генә булып һығылып сығып ағыу (күҙ йәше, кан һ. б. ҡарата).

**2.** Шыйыҡ өлөшө, һыуы һөҙөлөп йәки яй ғына буйлап аға-аға ҡороу, кибеү. *Һарккан корот. Йыуып түңкәргән һауыт-һаба һаркып тора.*

**ҺАРҠЫУ** [2] *к.* **1.** Түбәнгә ауышыу; түбәнләү (ҡояш, ай тураһында). *Кояш тауға һарккандa бөтә ялан буш калды.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Йыл, көн тәүлектәре билдәле бер ваҡытҡа, миҙгелгә табан йүнәлеш алыу, үҙгәреү. *Көн кискә һарҡты. Көҙгә һарккан мәл. Яҙға һаркыу.* ■ *Кояш кискә һарккан, ә көн һаман томра ине.* Я. Хамматов.

◆ **Кискә һарҡыу** кискә табан. *Бер көнө, кискә һаркыу, атайым Мәлек байҙарға бесән сабышырға өмәгә барып, арып, кара тир булып кайтты.* Һ. Дәүләтшина

**ҺАРҠЫУ** [3] *и.* Түбәнгә табан киткән ер йәки тараф; *киреһе* үр. *Һаркыуҙан төшөү. Һаркыуға табан йүгереү.* // *Һаркыу юл.* ■ *Ат бик ялкау булды бит, һаркыуҙа ла йүнләп юртмай.* С. Агиш. *Һәр артыуҙың артында һаркыу бар.* Т. Йәнәби. *Арбалар, йөктәр берәм-берәм тауға менәләр ҙә, һаркыуға төшөп, куҙҙан юғалалар.* Һ. Дәүләтшина. **Баш һарҡыуы** *диал.* түбәнгә киткән ер. *Алда ур юк, өйгә тиклем баш һаркыуы.*

◆ **Һарҡыу тотоу** арба, сананы түбән төшкәндә үҙ ыңғайына ебәрмәй яй тотоп барыу (атҡа ҡарата). *Һаркыу тотмаған ат.*

**ҺАРҠЫУЛАУ** *к.* Түбәнгә табан йүнәлеш алыу; һарҡыуға китеү. *Юл һаркыулап китте.*

**ҺАРҠЫУЛЫҠ** *и.* Һарҡыу ер. *Һаркыулыктан төшөү.*

**ҺАРЛЫҒЫУ** *к. кар.* **һарылыу.**

**ҺАРМАҠ** [1] *и.* Еңел, етеҙ көйгә йырланған йыр; таҡмаҡ. *Һармак әйтеү.* ■ *Башкорт фольклорында әйтем төркөмөндә .. 13—14 жанр бар. Улар: .. әйтемсәк, һамак, һармак, уйынлы йыр, такмак.* Ғ. Амантай.

**ҺАРМАҠ** [2] *и.* Алйот, йүләр. *[Даһи:] һармак һин, апай, кыуанырға кәрәк, ә һин бәлшәйәһең.* Ш. Насыров.

**ҺАРМАҠЛАНЫУ** *к.* Аҡылһыҙланыу, һармаҡ [2] булыу. *Талха уҙ серен һаклай алмай, кыҙҙар араһында һармакланып йөрөнө.* Ж. Кейекбаев.

**ҺАРМАҠЛАУ** *к.* **1.** Еңел, етеҙ көй менән йырлап әйтеү; һармаҡ [1] әйтеү; таҡмаҡлау. *Кыҙ илай-илай сүлмәгенә һармаклай: «Сүлмәк апай, сүлмәк апай, тамакһыҙлыктан йөҙәнем, апай, йөҙәнем апай!»* (Әкиәттән).

**2.** *кусм.* Телде яҡшылап белмәгән көйөнсә әҙ-мәҙ һөйләшеп маташыу; һупалау. *Рауза хәҙер ике телде лә якшы белә. Мин дә руссаны апарук һармаклайым.* Ҡ. Ибәтуллин.

**ҺАРМАҠҺЫУ** *к.* Алйот һымаҡ булыу, иҫәрләнеү. *Бер катлылык менән бала һымак һармакһыным.*

**ҺАРМЫШ** *и.* Ҡатындың икенсе ире (шул ҡатынға ҡарата). *Катындар икенсе иргә барһалар, был иренә «һармыш»* тип өндәшәләр. М. Ҡулаев.

**ҺАРНАУ** *к.* **1.** Һармаҡ [1] рәүешендә еңел көйләп әйтеү. *Солтанбәктең был көйҙәре һарнау түгел, моң икән* (Таҡмаҡтан).

**2.** *кусм.* Ниҙер өйрәтеп, туҡып һөйләү. *Китер сакта Карас батыр: «Килдешкә хәҙер генә кеше ебәрегеҙ, тиҙ генә барып етһен. Кук ала ат киткәнгә окшай, һары як кола атты менһен»,— тип һарнап китә* (Әкиәттән).

**ҺАРНАУСЫ** *и.* Һар [2] әйтеүсе.

**ҺАРПАТ** *и. кар.* **сарфат.**

**ҺАРТ** *и.* **1.** Бер башҡорт ырыуының исеме.

**2.** *иҫк.* Элек-электән ултыраҡ тормош менән йәшәгән үзбәктәрҙең исеме. *Тегендә кырғыҙ-каҙактар урыҫтарға мал, бында һарттар уҙ еренән килтергән тауар алмашалар* (Әкиәттән).

**ҺАРТАЙ** *и.* Боронғо бер башҡорт ырыуының исеме. *Һуңғы һартай.*

**ҺАРТЫУ** *и.* Ҡыр йәнлектәренең ҡар үҫтөндәге кесе яраү эҙе; һарыу.

**ҺАРУЙ** *и. диал.* Һарауыс.

**ҺАРУН** [*ғәр.*] *с.* Бик ныҡ һаран. *Һарун булыу.* ■ *Һарун байҙар йәшәй был ерҙә, кәрәк тапһа, каныңды ла һурыр.* З. Биишева.

**ҺАРУТ** *и.* Башаҡлылар ғаиләһенә ҡараған оҙон аҡ тамырлы ҡыйылүләне; аҡтамыр. *Улар рәт араларындағы һаруттарҙың ак тамырҙарын аяуһыҙ рәүештә кырка-кырка .. коро тупракты йомшарта башланылар.* Ә. Вәли.

**ҺАРҺЫЛЫУ** *к.* Йөрәк ныҡ әрнеү, йөрәк өҙөлөү. *Әсә меҫкен, бала тип, йөрәге һарһыла.*

**ҺАРҺЫТЫУ** *к.* Йөрәк үтә ныҡ әрнеү; йөрәк өҙөлөү. *Кош ояһының иң бейегенә бер һандуғас килеп кунған да һарһытып һайрай башлаған.* Ж. Кейекбаев.

**ҺАРЫ** [1] *с.* **1.** Ҡыҙыл менән йәшел араһындағы, көҙгө ҡайын япрағы, алтын төҫөндәге төҫ

спектрында иң төп төҫтәрҙең береһе. *Һары буяу. Һары таҫма. Һары япраҡ. Һары күлдәк. Сей һары. Ҡыҙыл һары. Аҡһыл һары.* ■ *Сәғиҙә санала яткан ҙур яғалы һары тунды кейҙе лә Гөлнур менән хушлашты.* М. Тажи.

**2.** Аҡһыл асыҡ төҫтәге (кешенең тәненә, сәсенә ҡарата). *Һары мыйыҡ.* ■ *Бында [залда] бөтөнләй минең өсөн ят донъя. Әллә ниндәй күк күҙле, һары сәсле егеттәр, ҡыҙҙар теҙелешеп ултырғандар.* Т. Йәнәби. *Һары ла сәсен үреп һал да, беҙ киткәндә оҙатып тороп ҡал* (Халыҡ йырынан).

**3.** Йәнлек, ҡош-ҡорт, үҫемлектең төҫө буйынса төрөн билдәләгәндә ҡулланыла. *Һары шәшке. Һары ерек. Һары лилия. Һары ҡамыш.* ■ *Ҡолас йыуанлыҡ ҡара ерек менән бер рәттән һирәкләп һары ерек ... ултыра.* Ә. Вахитов. / Ҡайһы бер йәнлек, ҡош-ҡортҡа эпитет итеп ҡулланыла. *Кейеҙбай һары толпарға атланып ала ла ҡалаға .. майҙанға ҡарай сығып китә* ( Әкиәттән). *Һайрамасы һары һандуғасым Һаҡмар буйкайҙарын яңғыратып* (Халыҡ йырынан).

♦ **Йомортҡа һарыһы** йомортҡаның нң урталағы ялағы бирә торған өлөшө. **Таң һарыһы** *йәки* **һары тан** *бар.* таң [1] **1.** *Таң һарыһы ҡалҡты. Таң һарыһы менән тороу.* **Таң һарыһынан** *йәки* **һары таңдан** *ҡар.* **таң** [1] 1. *Һары таңдан юлға сығыу.* **Һары алтын** иң юғары сифатлы алтын; һум алтын. **Һары бал** йүкә йәки сәскә балынан ҡойолған иң һәйбәт бал. *Ай һары бал һары бал, һары булды һалығыҙ, арыҫландай батырҙарҙың арҡаһынан ҡағығыҙ!* (Халыҡ йырынан). **Һары май** *ҡар.* **май** 1. **Һары торма** *иҫк.* кишер. **Һары һыу** *ҡар.* **һыу** [1].

● *Ҡара кешенең тире сыҡҡансы, һары кешенең йәне сығыр.* Әйтем. *Сабыр төбө һары алтын.* Мәҡәл.

**ҺАРЫ** [2] *и.* **1.** Тәнде һарғайта торған бауыр ауырыуы. *Һары менән ауырыу.* **Ҡара һары** һары ауырыуының бик ҡаты төрө. *Ғәләмшә әбейҙең ире һары менән өс йыл ауырыны. Унан ҡара һарыға әйләнеп, ярты йыл йөрөнө лә үлеп китте.* С. Агиш. **Һары һары** һары ауырыуының ҡара һарынан да көслө төрө. *Һары һары менән ауырыу.*

**2.** *күсм.* Йөҙгә моңһоу төҫ биргән ауыр кисереш, һағыш, моңзар. *Хәсрәт һарыһы. Һарыға һабышыу.* ■ *Нурлы йөҙөң һары баҫҡан, Барсынһылыу, серле күҙең ҡайғы баҫҡан, Барсынһылыу.* «Алпамыша». *Илкәйемде һағынып үйлай-үйлай, йөрәкәйем башын һары алған* (Халыҡ йырынан).

**ҺАРЫБАУЫР** *и.* **1.** Емеш ағастарын ашай торған аҡ ҡанатлы, ҡорһаҡ осо алтын һарылы төнгө аҡ күбәләк төрө.

**2.** *с. мәғ.* Бауыр аҫты һары төҫтә булған төрлө йәнлектәргә ҡарата. *Һарыбауыр кеҫәртке. Һарыбауыр төлкө.*

**ҺАРЫБАШ** *и. диал.* Бәпембә. *Ҡалды буйы ғына әй ҡалды инде һарыбаш, һарыбаш үлән алды инде* (Халыҡ йырынан).

**ҺАРЫГҮҘ** *и.* Алһыу сәскәле, сей һары һеркәле дарыу үләне.

**ҺАРЫҒОШ** *и.* Атаһының ҡанаты, ҡойроғо ҡара, бүтән ере һары, ннәһе тотош буҙ сыбар төҫтәге турғайҙар ғаиләһенә ҡараған урман ҡошо; үтәбикә. *Һарығош тауышы.* ■ *Июль урталарында .. урман моңона һарығош, буҙәнә менән тартай ҡушыла.* Я. Хамматов.

**ҺАРЫҒЫС** *и. диал.* Һарыуыс.

**ҺАРЫҒЫУ** (һарыҡ*ғ*) *ҡ.* **1.** Бер ергә, берәй йүнәлешкә ыңғайлап хәрәкәтләнеү; һарылыу. *Урман тулы йәйәүле һәм атлы ғәскәрҙәр .. Арыҫлан ағай ҡапҡаһына ҡарай һарыға ине.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**2.** *ҡар.* **һарҡыу** [1] 1.

**ҺАРЫҠ** *и.* **1.** Ите, йөнө өсөн аҫралған көйшәүсе ваҡ йорт малы. *Аҡ һарыҡ. Нәҙек йөнлө һарыҡ. Һарыҡ тиреһе. Һарыҡ тәкәһе. Һарыҡ бәрәсе. Һарыҡ һуйыу.* ■ *Бүренән ҡасып, бер урынға өйөлгән һарыҡтар кеүек бер урынға йыйылдыҡ.* Д. Юлтый. **Бәрән һарыҡ** бер мәртәбә бәрәнләгән йәш һарыҡ. **Ҡуй һарығы** *йәки* **оҙдой һарыҡ** оҙон, ҙур ҡойроҡло һарыҡ. **Оло һарыҡ** өстән артыҡ бәрәнләгән һарыҡ. **Шешәк һарыҡ** ике мәртәбә бәрәнләгән һарыҡ. **Һарыҡ көтөүе [һымаҡ]** анһыҙ рәүештә эйәргән төркөмгә ҡарата әйтелә.

**2.** *күсм.* Аңра, аңһыҙ кешегә ҡарата әйтелә. *[Бәкер:] Мине ҡотламайһыңмы ни, бисәкәй? [Тайфа:] Мин шул аңра һарыҡ. Ҡотлайым, Әбүбәкер.* И. Абдуллин.

♦ **Һарыҡ тубырсығы** *ҡар.* **тубырсыҡ.**

**ҺАРЫҠ-КӘЗӘ** *и. йыйн.* Ваҡ мал.

**ҺАРЫҠСЫЛЫҠ** *и.* Һарыҡ үрсетеү, аҫрау эше менән шөғөлләнгән хужалыҡ *Һарыҡсылыҡ фермаһы.* ■ *Башҡортостанда һарыҡсылыҡ юғары үҫеш алды. Һарыҡсылыҡ бигерәк тә Урал арты райондарында алға киткән.* М. Хисмәтов.

**ҺАРЫҠТАШ** *и.* Боҙ дәүеренән ҡалған ҙур йомро таш. *Беҙ .. күршем менән көндөҙгө эҫе ҡояштан һыуынырға өлгөрмәгән ҙур һарыҡташ өҫтөндә ултырабыҙ.* И. Абдуллин.

**ҺАРЫЛТЫУ** *ҡ.* **1.** Иркәләтеп, яҡынларға, яҡын ылыҡырға ирек ҡуйыу. *Муйынға һарылтыу.*

**2.** Һарылырға мәжбүр итеү. *Ел болоттарҙы тауға һарылтты.*

**ҺАРЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** Кемгә йәки нимәгәлер тартылып, бик яҡын килеү; һырлығыу. *Муйынға һарылыу. Эт итәккә һарыла. Һарылып ятыу.* ■ *Ул [Миңлебикә] ошо әүрт йыл эсенә һүҙгә һаранланыбыраҡ китте, ир-ат тирәһенә һарылып бармай.* Н. Мусин. *[Мактымһылыу:] Мин ҡалымға һатылмам, егете ир булмаһа; ҡуйынына һарылмам, һөйөүҙә йор булмаһа.* «Ҡара юрға».

**2.** *күсм.* Уратып алып ҡаплау; солғау. *Аҡҡош кеүек аҡ болоттар һарылалар ҡаяларға.* С. Ҡудаш. *Тәнемә йоҡо һарыла, мут күҙен төбәп.* Р. Назаров.

● *Һаранға һарылма, балыҡҡа ҡарылма.* Әйтем.

**ҺАРЫМСАҠ** *и.* **1.** Ләлә һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған ҡыяҡ япраҡлы, баҡса үҫемлеге. *Һарымсаҡ түтәле.*

**2.** Шул йәшелсәнең еҫле, бүлкәт-бүлкәт һуған һымаҡ башы. *Эре һарымсаҡ. Һарымсаҡ ашау.*

**ҺАРЫН** *и.* Һамаҡ рәүешеидә еңел көй менән әйтелгән йыр; һар [2]. *Һарын әйтеү.*

**ҺАРЫНА** *и.* **1.** Ләлә сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған күк төҫтәге эре ҡыңғырау сәскәле, һарымсаҡ һымаҡ бүлкәт-бүлкәт булып торған һап-һары төплө урман үләне. *Һарына сәскәһе.*

**2.** Шул үҫемлектең һары төҫтә һарымсаҡ һымаҡ тубырсағы. *Һарына буткаһы. Һарына тәлгеһе. Һарына ҡаҙыу.* ■ *Минең бер йыл буйы икмәк төҫө күргәнем юк. Ямантау аҫтында эрҙәнә ҡырҡҡанда һарына, балтырған, ҡаҡы өйрәһе менән тамаҡ ялғай торғайнык.* М. Тажи.

♦ **Ҡара һарына** абағаның атаһы.

**ҺАРЫПЛАШЫУ** *к. диал.* Әрепләшеү.

**ҺАРЫСА** [1] *с.* Һары төҫтәге. *Һарыса ук атымды бәйләп ҡуйҙым һаҙ буйҙары һары ла ҡамышҡа* (Халыҡ йырынан).

**ҺАРЫСА** [2] *и.* Көҙ миҙгеленең япраҡтар һарғая башлаған *мәле. Күптән йәйге селлә айҙары үтеп киткән һәм тышта емеш-еләк вәғәҙә итеүсе һарыса айы ла бөтөп бара ине.* К. Мәргән.

**ҺАРЫСАЙ: һарысай турғай** турғайҙар ғаиләһенә ҡараған һырты һор, башы-ҡорһағы һарғылт төҫтәге һайрар турғай. *Иртә генә тороп мин ҡараһам, һарысай турғай һүтә үйынды* (Халыҡ йырынан).

**ҺАРЫТҮШ** *и. диал.* Ҡарабаш турғай (*ҡар.* **турғай** I).

**ҺАРЫУ** [1] *к.* **1.** Бер ергә йыйылып ҡуныу. *Умартанан сыҡҡан күс бакса уртаһындағы оҙон ҡарамаға һарый башланы.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Күңел менән тартылып, яҡын ылығыу; һарылыу. *«Ниңә ҡайттың?» — тиһә, һарып әсәй, «һағындырҙы һине»,— тиермен.* Ғ. Амантай.

● *Ҡорттоң инәһе ҡайҙа ҡунһа, күсе шунда һарыр.* Әйтем.

**ҺАРЫУ** [2] *к.* Кесе ярау итеп, билге һалыу (эт, бүре һ. б. ҡарата). *Бүре мискәгә һарымаҡ итте, ти. Егет мискә тишегенән ҡулын тыҡҡан да, тотҡан да алған тегенең ҡойроғонан* (Әкиәттән).

**ҺАРЫУ** [3]: **һарыу ҡайнау** 1) үҙәк көйөү. *Әсе нәмәнән һарыу ҡайнай;* 2) нык асыу килеп, ярһыу, йән көйөү. *Ҡыҙғаныска ҡаршы, меҫкендәр бар әле донъяла, шуның өсөн һарыу ҡайнай, шуның өсөн йөрәк яна ла.* Б. Бикбай. *Һарыуым ҡайнай шағир яраклашһа, осһоҙ уңыш менән иҫереп, шиғриәткә хурлыҡ килтереп.* Р. Сафин.

**ҺАРЫУ** [4]: **кәләп һарыу** *диал.* кәләп һалыу.

**ҺАРЫУЫС** *и.* Айырған ҡорт күсе һарыһын өсөн дүрт ҡаҙыҡ башына ҡабыҡ ябып яһаған нәмә; һарығыс. *Һарыуыс ҡороу.* ■ *Ҡорт тубалы — һарыуыс тип атала, сөнки ул айырылып сыҡҡан кортка һарыу өсөн ҡуйыла.* Ж. Кейекбаев.

**ҺАРЫШЫУ** *к. диал.* Һарылыу.

**ҺАҪЫ** *с. диал.* Һаҫыҡ.

**ҺАҪЫҠ** *с.* Насар, боҙоҡ еҫле. *Һаҫыҡ һауа. Һаҫыҡ булыу.* ■ *Аҡҡош төшмәҫ һаҫыҡ һаҙға, унда уға аҙыҡ та юк, ҡыҙыҡ та юк.* Ҡ. Даян.

● *Арпа-көрпә аш булды, һаҫыҡ талаҡ баш булды.* Әйтем.

**ҺАҪЫТЫУ** *к.* Һаҫыҡҡа әйләндереү, һаҫыҡ итеү. *Бер күлде һаҫытып икенсе күлгә килдеңме?* Х. Ғәбитов.

**ҺАҪЫУ** *к.* Боҙолоп насар еҫ сығарыу, һаҫыҡка әйләнеү, һаҫыҡ булыу. *Һаҫыған балыҡ. Һаҫыған май. Һаҫыған һыу.* ■ *[Ғариф:] һеҙ икәүләп булһа ла барығыҙ инде, малайҙар. Берәй һуйыр эләгер ҙә боҙолоп, һаҫып ятыр.* Н. Мусин.

**ҺАТАШТЫРЫУ** *к.* **1.** Һаташырға мәжбүр итеү. *Тиф кешене һаташтыра.*

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **һаташыу** 1. *Таң аттыра алмай күҙ тона. Саҡ ҡына иҙрәп киттеңме — һаташтыра башлай.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** *күсм.* Яңылыштырыу, буталдырыу. *Хыялдары алтын бала саҡтың һаташтырып ҡына йөрөнө.* Ғ. Дәүләтов.

**ҺАТАШЫУ** *к.* **1.** Йоҡлағанда-йәки нык ауырығанда аңһыҙ рәүештә һөйләнеү йәки нимәлер ҡыланыу. *Һаташып йоҡлау.* ■ *Биксән ағай төнө буйы һаташып сыға. Йоҡоһо — йоҡо түгел.* Р. Солтангәрәев.

**2.** *күсм.* Яңылышыу, буталыу. *[Гөлзифа:] Нишләп миңә ҡайны-ҡәйнә булһын! Әллә һаташа башланыңмы, әсәй.* Ҡ. Даян. *Мин әллә ни балыҡсы түгел. Шулай ҙа йылына бер-ике тапҡыр балыҡ менән һаташып алғылайым.* А. Ғирфанов.

**ҺАТИФ** *и. иҫк. кит.* Йәшерен эске ауаз. *Һатифтан килгән тауыш.*

**ҺАТЛЫҠ** *с.* **1.** Һатыуға тәғәйенле, һатыла торған. *Һатлыҡ мал.*

**2.** *күсм.* Үҙ файҙаһы өсөн намыҫһыҙлыҡ эшләгән, хыянат иткән, хыянатсыл. *Һатлыҡ йән.* ■ *[Арғынбай:] Ярлыларҙы яклап мин яу саптым, ә һин, һатлыҡ, батшаға теҙ сүгеп, беҙгә ҡаршы ҡорал күтәрҙең.* Б. Бикбай. *Бөтһөн ҡоллоҡ, бөтһөн һатлыҡ йәндәр! Бөтһөн табыныу алтын, көмөшкә!* Д. Юлтый.

**ҺАТТА** [*гәр.*] *р. диал.* Һаман.

**ҺАТТЫРЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **һатыу.** *Шулай итеп, ерҙәрҙе һаттыралар, муйын тиңге бурыска баттыралар* (Бәйеттән).

**ҺАТЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **һатыу** 1. *Һатылған иген. Кейем-һалым һатылыу.* ■ *Мин бисара, теҙгененән тотоп, һатылып ҡына килгән мал кеүек* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Үҙ файҙаң өсөн хыянат ҡылыу, кемгәләр бирелеү, кемгәләр хеҙмәт күрһәтеү. *Аҡсаға һатылыу. Дошманға һатылыу.* ■ *Һиндә намыҫ юк! Шуларҙың [Гаяз байҙың] бер ҡабым иттәренә һатылып йөрөйһөң, тип атайым мине тукмап сығарҙы.* Д. Юлтый. *Инде, хаин, үлем алдында ҡурҡып тағы кемгә һатылдың.* М. Сөндөклө.

**ҺАТЫУ** *к.* **1.** Нимәнелер билдәле бер хаҡҡа биреү. *Ат һатыу. Ит һатыу. Дәүләткә иген һатыу. Арзан һатыу. Күмәртәләп һатыу. Баҙарға сығарып һатыу. Һатып алыу. Һатып биреү.* ■ *Ябыҡ ҡына малай батмус тотоп, һатып йөрөй татлы нәмәләр.* М. Кәрим. *Ат якшыкайҙары ай ала аяк, акса биреп һатып алайык* (Халыҡ йырынан). / Ниҙер хаҡына кеше ҡарамағына тапшырыу. *Ул хәйерселәр .. тамаҡ түйҙырыу өсөн фабриканттарға көсөн һата.* Д. Юлтый. *Үҙ бәхеткәйҙәре ай булмағас, һата бахыр башын малдарға* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Кемгәләр, нимәгәләр тоғролоғоңдо боҙоу, уға хыянат итеү. *Кешене һатыу. Намыҫты һатыу. Яманатты һатыу.* ■ *Тыуған ерен һаклаған, ир намыҫын һатмаған батыры бар был илдең* (Ҡобайырҙан).

**3.** *кусм.* Бушка күп итеп һөйләү. *Гәп һатыу. Ғәйбәт һатыу. Ләстит һатыу. Сафсата һатыу. Фәлсәфә һатыу. Әңгәмә һатыу. Әкиәт һатыу.* ■ *Гәп һатып ултырыусы кыҙҙар бригадир күренеү менән шып туктаны.* И. Әхтәмйәнов. *Өй беренсә кыҙырып, ошак һатма, киленсәк* (Туй йырынан).

□ **Һатыу итеү** һатыу эше менән шөғөлләнеү. *Беҙ, әйе, ышлыялар, сыбырткылар менән генә һатыу итә инек.* С. Агиш.

♦ **Акыл һатыу** *кар.* **акыл. Исем һатыу** *кар.* **исем. Күҙ һатыу** *кар.* **күҙ.**

● *Атанан якшы тыуһа, атып ашар, яман тыуһа, һатып ашар.* Әйтем. *Ерен һаткан — гүрен һаткан.* Мәкәл. *Илен һатып ашаған ике көн генә йәшәгән.* Мәкәл. *Һөйләшмәй һатыу — кукрәккә катыу.* Әйтем.

**ҺАТЫУЛАШЫУ** *к.* **1.** Нәмәнең хакын кәметтерергә тырышып һөйләшеү; сауҙалашыу. *Һатыулашмай алыу. Һатыулашып тороу.* ■ *— Мылтығыңды күпмегә һатаһың, бабай? ..[Моңкилмәс] .. бер илле һум .. тип һатыулашкан булды, ти* (Әкиәттән).

**2.** *кусм.* Нимәгәлер үҙ-ара риза булмай һүҙ көрәштереү. *Малайҙар шул .. кабалан араһында: «Һиңә айтә, һиңә әйтә!» тип үҙ-ара һатыулашып алырға ла өлгөрәләр.* С. Агиш. *Ә теге тәтәй кыҙ Сания: «Әллә кайҙа, йәһәннәм төбәгендә яткан ауылдарға китеп, башымды юғалтыр хәлем юк. Өфөгә якын ғына бер ауылға ебәрһәгеҙ, бәлки, барырмын..“,— тип талашты, һатыулашты.* М. Тажи.

**ҺАТЫУСЫ** *и.* Магазинда йәки бер сауҙа ойошмаһында һатыу иткән кеше. *Һатыусы булып эшләү.* ■ *Урам мөйөшөндәге бер һатыусынан помидор һатып алдым.* С. Агиш. / Һатыу эше менән шөғөлләнгән кеше; һатыу итеүсе. *Алма һатыусы. Сәскә һатыусы.*

**ҺАТЫШЫУ** *к. урт. кар.* **һатыу.**

**ҺАУ** *с.* **1.** Ауырыуы юк, сырхауһыҙ; сәләмәт, сирле түгел. *Һау кеше. Һау булыу.* // *Һау йәшәү. Һау тороу.* ■ *Кыҙык. Кеше шулай һау сағында ғына үҙен гәжәп көслө, бөтә донъяның хужаһы кеүек тоялыр инде.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Зыян, зарарһыҙ; имен. *Донъя малы өсөн кайғырмайым, көллө ағзаларым һау булғас* (Халык йырынан). **Баш һау булһа** *йәки* **һау булһак** бер эш, ниәт алдынан теләк рәүешендә әйтелә. *[Бабай:] һау булһак, иртүк барып етербеҙ.* Б. Бикбай. **Һау булһын!** ниҙелер икенсе бер нәмәнән артык күргәнде белдереп әйтелә.— *Төкөрҙөм мин Ныязголдоң повозкаларына, үҙемдең кола атым һау булһын!* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Һау бул(ығыҙ)** хушлашыу, һаубуллашыу һүҙе. *Китәм инде, һау бул, Колғәйшә.* Ғ. Амантай. **Һаумы(һығыҙ)** осрашканда иҫәнләшеү һүҙе. *Биктимер .. инә лә: «Иҫәнме, һаумы?»,— тип иҫәнләшә* (Әкиәттән).

● *Аркан ишһәң, бау булыр, арбаң-санаң — һау булыр.* Әйтем. *Тирә яғың яу булһа, өйөң эсе һау булмаҫ.* Әйтем.

**ҺАУА** [1] [*гәр*] *и.* **1.** Кеше, хайуандар һәм үҫемлектәрҙең тереклегә өсөн кәрәк булған, күбеһенсә азот менән кислородтан торған ерҙең атмосфераһындағы газдар катышмаһы. *Саф һауа. Тонсоу һауа. Һауа баҫымы.* ■ *Йәшел урман һауаһы тәндең якшы дауаһы.* К. Даян.

**2.** Ер өҫтөндәге иркен бушлык, арауык; күк, күк йөҙө. *Һауаға осоу. Һауалағы болот.* ■ *Һауаға аткан уккайым тау-урмандар аша уҙһасы.* Салауат Юлаев.

**3.** Билдәле бер вакыттағы көн торошо (йылы, һыуык, кар, ямғыр һ. б.). *Һауа торошо. Һауа шарттары.* ■ *Шушенскийҙа ай ҙа, йондоҙ ҙа юк, һауа китте кырка боҙолоп.* Р. Ниғмәти. *Шунан һауа томраланып киткән, ти* (Әкиәттән).

♦ **Асык һауа** йорт, бина эсе түгел; тыш. *Асык һауала эшләү.* ■ *Кәртә-кураларҙа асык һауалағы кеүек буран уйнай.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Кош һауала, ат тауҙа, егет яуҙа һынала.* Мәкәл. *Саф һауа тәнгә дауа.* Әйтем.

**ҺАУА** [2] *и.* Ғорурлык, эрелек, маһайыу, мактаныу тойғоһо. *Йәшлек һауаһы.* ■ *Йөрөйөм әллә кем булып .. бригадир, значит, мин түрә кеше! Тьфу! Йәшлек һауаһы шулай икән ул ана.* И. Ғиззәтуллин.

● *Тауыкта ла һауа бар.* Әйтем.

**ҺАУАЛАНЫУ** *к.* Маһайыу, мактаныу, эреләнеү. *Һауаланып китеү.* ■ *Һыуһылыу әбей улын бисәләр мактағанға, башы куккә тейерҙәй булып һауаланды, .. уларҙың һүҙҙәрен ишетмәмеш булып маһайып торҙо.* Ғ. Дәүләтшин. *Һауаланма атандың байлығына, ололанма йөҙөндөң айлығына.* Акмулла.

**ҺАУАЛАТЫУ** *к.* Һауаға, үргә күтәрелдереү; куккә осороу. *Кук ыласынымды һауалаттым ялтыраған кулдәрем һайын* (Халык йырынан).

**ҺАУАЛАУ** *к.* Һауаға, үргә күтәрелеү. *Һауалап осоу.* ■ *Йәй ҙә үтеп китте, ахыры, һауалай бит торналар.* Р. Ғарипов. *Кояш һауалағас, таныш һукмак таптык болонда.* Р. Бикбаев.

**ҺАУАЛЫ** *с.* Мактансык, тәкәббер. *Һауалы кеше. Һауалы булыу.* ■ *Шәукәтов роле Р. Сыртланов башкарыуында власть яратыусы, мактансык .. бер һауалы кешене күрәбеҙ.* Р. Ниғмәти. *Ноғомановты .. кеше өсөн бик илтифатлы тиҙәр .. Башлы кеше — һауалы түгел.* Ә. Харисов.

**ҺАУАЛЫЛЫК** *и.* Һауалы булған хәл, тәкәбберлек, эрелек, мактансыклык. *Һауалылык менән.*

**ҺАУАП** [*гәр.*] *и.* Дини хөрәфәт буйынса: дини йоланы үтәп, укыған доғалар йәки тормошта кылған игелектәр, якшылыктар өсөн алла рәхмәте булып үҙенә кайта торған игелек, әжер. *Ҙур һауап. Һауап булыу.* ■ *Шәриф менән Бәҙри сәй эскәндә Йәмилә тураһында һөйләп алдылар: — Әллә ире кайтмаһа, өйҙәш итеп алайыкмы икән? Һауап булыр,— тине Бәҙри.* М. Ғафури. *[Колсобай:] Исмаһам, шул балаларҙы үҫтерһәм һауабы булыр.., тип уйланы.* Я. Хамматов.

♦ **Етегән йондоҙон ете уратып әйтһәң, һауап була** балалар уйынында тын оҙонлоғон һынау ярышында әйтелә торған һүҙҙәр.

● *Саҙакаһына күрә һауабы, һүҙенә күрә яуабы.* Әйтем.

**ҺАУАПЛЫ** *с. дини.* **1.** Һауап килтерә торған (эш, хәлгә карата). *Һауаплы эш.*

**2.** Һауап килтерә торған эш эшләп, һауап алған (кешегә ҡарата). *Һауаплы булыу.* ■ *[Атаһы:] Хәҙер инде, балам, мәҙрәсәлә уҡымағас, ҡайт үҙебеҙгә. Ситтә уҡытып йөрөгәнсе, үҙ ауылыбыҙҙың балаларын уҡытырһың, һауаплы ла булырһың.* Ғ. Ғүмәр.

**ҺАУБУЛЛАШЫУ** *ҡ. һөйл.* Хушлашыу.

**ҺАУГҮНӘК** *и. диал.* Һауым [1] көнәге.

**ҺАУҒЫС** *и. һөйл.* Һыйыр һауа торған аппарат. *Һауғыс менән һауыу.* ■ *Силәктәреңде алмаштырып ултыртып ҡына өлгөр, импульслы һауғыстар көтөп тормай.* И. Ғиҙҙәтуллин.

**ҺАУҘЫҠ** *и. диал.* Орғасы.

**ҺАУҘЫРЫУ** *ҡ.* **1.** *йөкм. ҡар.* **һауыу.** *Эткол бейәләрҙе һауҙырып, ҡымыҙын мискәләргә ҡойоп туңдырып .. әҙерләтеп ҡуйҙы.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Һауырға мөмкинлек булыу, ирек ҡуйыу (һауын малға ҡарата). *Һыйырҙар быҙауһыҙ ҙа һауҙыра.* / Һөт биреүен дауам итеү, һыуалмау. *Һөтсөлөк фермаһы йылдан-йыл үҫә. Хәҙерге көндә унда 72 һыйыр һауҙыра.* М. Тимербулатов.

**ҺАУИӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Упҡын; тамуҡ. *[Мулла — Ҡарлуғаска:] Өндәшмә, тамуҡ киҫәүе! Урының һауиәнең иң төрөндә булыр!* Б. Бикбай.

**ҺАУҠЫ** *и. һөйл.* Теләк, зауыҡ.

● *Һауҡы төшмәй, күңел тәй.* Әйтем.

**ҺАУЛАУ** *ҡ.* Һау-һау итеп һауылдау. *Һаулап өрөү.* ■ *Ялбыр йөнлө Алабай, .. сит-ят кеше килә ҡалһа, һаулап сығып абалай.* Ғ. Амантай.

**ҺАУЛАШЫУ** *ҡ.* Осрашҡанда күрешеү, сәләм бирешеү; иҫәнләшеү йәки айырылғанда хушлашыу. *Ҡибла яҡтан ел иҫте, тулҡынланды ҡул өҫтө; бар ағастар шаулашты, сәләмләште, һаулашты.* Ш. Бабич. *Айбулат Васяның ҡулдарын тағы бер ҡат ҡыҫып һаулашты ла сығып китте.* Һ. Дәүләтшина.

**ҺАУЛЫҠ** *и.* Ауырыуы, сире булмаған, һау булған хәл. *Һаулығы яҡшы. Һаулыҡты һаҡлау.* ■ *[Ҡарт:] Хуш һаулыҡта күрешәйек, уҙаман, тине лә юлына китте.* Т. Хәйбуллин. *Иҫән булһаҡ бер ҡайтырбыҙ, теләп улың һаулығын* (Халыҡ йырынан).

◆ **Һаулыҡ алыу** һаулыҡ һорап өндәшкән кешегә яуап биреү. *Биктимер: «Иҫәнме, һаумы?» — тип иҫәнләшә. Аждаһа уның һаулығын ала* (Әкиәттән). **Һаулыҡҡа туймау** сырхау, сирле булып ыҙа сигеү, һәр саҡ ауырыу. *Үҙ-үҙемә хайран ҡалам: башҡынайым туймай һаулыҡҡа* (Халыҡ йырынан). **Һаулыҡ һорау** (*йәки* **һорашыу**) иҫәнләшеү.

● *Ауырыу күрмәгән һаулыҡтың ҡәҙерен белмәҫ.* Әйтем. *Һаулыҡ — байлыҡ.* Әйтем.

**ҺАУМАЛ** *и.* Яңы ғына әҙер булған йәш ҡымыҙ. *Табын гөр килә. Тирә-яҡҡа мәрәкә һүҙ менән һаумал ҡымыҙ еҫе бөркөлә.* Р. Бикбаев. / Яңы һауылған бейә һөтө. *Ҡымыҙға һаумал өҫтәү. Һаумал менән ҡымыҙҙы емләү.* ■ *Көбөгә йылы, сөсө еҫ бөркөп торған һаумал шаулатып бушатылды. Бер тына бешеп алдылар.* Ф. Иҙәнғолов. *Һабала ҡымыҙ бөтһә, һаумалы әҙер булыр.* М. Буранғолов.

● *Һаумал эсһәң һимертә, ҡымыҙ эсһәң иҫертә.* Әйтем. *Һаумал эсһәң, ҡымыҙ юҡ; байтал менһәң, ҡолон юҡ.* Әйтем.

**ҺАУРЫ** *и.* **1.** Ат һыртының артҡы өлөшө, ян башы. *Ат һаурыһы.* ■ *Тамға ырыуҙың мөһөре бәрәбәрендә йөрөгән: ер биләме межаларында ла, ҡамыт-ыңғырсаҡтарҙа ла, ат һаурыйында ла .. күреп булған уны.* Ғ. Хөсәйенов. *Атҡа менһәң, һикереп мен, ат һаурыһы һелкенһен* (Халыҡ йырынан).

**2.** Һыйыр малы тиреһенән ҡыҙылға буяп эшләнгән күн. *Һауры ситек.* ■ *Һауры итек кеймәҫ наҙ инем, ҡыптыр итек кейеп йөрөймөн.* «Маҡтымһылыу».

**ҺАУ-СӘЛӘМӘТ** *с. йыйн.* Һау һәм сәләмәт имен, иҫән-һау. *Һау-сәләмәт булыу.* ■ *Һау-сәләмәт ҡайтһам Уралыма, тарих яҙыр инем таш ына* (Халыҡ йырынан).

**ҺАУҺАҠ** *с.* Ауырыуҙы, сирҙе белмәгән, һаулығы ныҡ, шәп. *Һауһаҡ бала. Һауһаҡ булыу.*

**ҺАУ-ҺАУ,** **һау ҙа һау** *оҡш.* Эт өргән тауышты белдергән һүҙ. *Хәтмулла тубыҡланып ултырҙы ла: «һау-һау!" — тип, эт булып өрҙө.* З. Хисмәтуллин.

**ҺАУҺАУЛАУ** *ҡ.* Һау-һау тип өрөү. *Ике э һауһаулап ҡапҡа аҫтынан килеп сыҡты ла, аба ларға кереште.* Х. Ғиләжев. / *күсм.* Әрләшеү талашыу. *Ҡалын тауышың сығарып, һауһаулама, киленсәк* (Халыҡ йырынан).

**ҺАУҺЫҘ** *с.* Һаулығы насар; сырхау. *Һауһы кеше. Һауһыҙ булыу.*

**ҺАУҺЫҘЛАНЫУ** *ҡ.* Һаулыҡҡа насарланыу, һаулыҡты юғалтыу; сырхауланыу. *Һауһыҙланып ҡалыу.*

**ҺАУЫҒЫУ** (һауыҡ*ғ*) *ҡ.* Ауырыу, сирле булға хәлдән һуң һауға әйләнеү, һау булыу; шәбәйеү. *Һауығып китеү.* ■ *Зәйнәпте өлкән профессор ҙар ҡараны. Ауыр операциялар, .. унан курорт ..Һауығып ҡайтты дүрт-биш айҙан һуң.* Ғ. Сәләм. *Төрлө-төрлө дарыу менән дауалап ҡа райҙар, ләкин ул [батша] һаман һауыҡма* (Әкиәттән).

● *Ялҡаулыҡтан ауырырһың, тырышлыҡта һауығырһың.* Әйтем.

**ҺАУЫЛДАУ** *ҡ.* Һау ҙа һау итеү, һау ҙа һа килеү. *Һауылдап өрөү.* ■ *Ҡарауыҙ юҡҡа-баҙ ға һауылдап тауыш ҡуптарырға, тамаҡ ярырға яратмай торғайны.* С. Кулибай.

**ҺАУЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **һауыу.** *Һыйырҙа һауылған.*

**ҺАУЫМ** [1] *и.* **1.** Һауын малдың һауылышы һөт һауылыуы. *Иртәнге һауым. Төшкө һауым Киске һауым.* ■ *Коммунист Һибәтов иптә колхозда беренсе булып ферманы өс һауымға күсерҙе.* З. Әхмәтов. *Һауымы еткән һыйырҙа мөңрәп сығыр быҙауһыҙ.* «Аҡбуҙат».

**2.** Һауып алынған һөт күләме. *Көнлөк һауым Һауым артыу.* ■ *Һауым күҙгә күренеп арт башлай. Һауынсылар аҙыҡты тәмләндереп аша та.* Х. Ҡадиров. **Һауым көнәге** һөт һауа торға күнәк.

**3.** *ҡар.* **һауын** [1]. *Һауым мал. Һауым һыйыр.*

● *Байтал менһәң — ҡолон юҡ, һауым м екһәң — ҡымыҙ юҡ.* Әйтем.

**ҺАУЫМ** [2] *и. этн.* Өс һабаҡ ептән торған ( үлсәү беррәмеге (ун һауым бер баҫма була).

**ҺАУЫН** [1] **1.** *с.* Һауҙырған, һөт биргән. *Һауы бейә. Һауын һыйыр.* ■ *Фермала туҡһан и*

*һауын һыйыр бар, уларҙы алты кеше ҡарай.* Ф. Абдуллин.

**2.** *ҡар.* **һауым** [1].

♦ **Һауын һыйыр** нимәнелер туҡтауһыҙ буш алыу өсөн сығанаҡ итеп ҡаралған кеше йәки ойошма, һ. б. тураһында әйтелә. *Мин һиңә һауын һыйыр түгел.* ■ *Самат крәҫтиәнгә: Ҡаҙау булһа ла, ҡалай кәрәкһә лә Зиннәт мырҙаға киләһегеҙ, тапҡанһығыҙ һауын һыйыр.* Х. Ибраһимов.

**ҺАУЫН** [2] *и. тар.* Йот йылында ярлы кешенең байҙан алып торған малы ҡырылып, түләүле булып ҡалыуы.

**ҺАУЫНСЫ** *и.* Һыйыр һауыусы. *Һауынсы булыу.* ■ *Һауынсылар бер бөләктәренә күнәген, икенсе ҡулдарына бүкәнен тотоп, һыйырҙары араһына йүнәлә.* Й. Солтанов.

**ҺАУЫР** *и. ҡар.* **һауры.**

**ҺАУЫРЛАШЫУ** *ҡ. диал.* Менгәшеү.

**ҺАУЫТ** [1] *и.* Әсенә нимәләр ҡойоп, һалып була торған нәмә. *Ағас һауыт. Бәләкәй һауыт. Ҙур һауыт. Быяла һауыт. Бал һауыты. Сәй һауыты. Тоҙ һауыты. Һауыт йыуыу. Һауытҡа һалыу.* ■ *Кинйә токсайын өс тапҡыр һелккәйне, бабай тотоп торған өс һауыт алтын менән тулды ла ҡуйҙы, ти* (Әкиәттән). **Ҡара һауыты** манып яҙыу өсөн ҡара ҡойоп ҡуя торған һауыт. *Ҡара һауыттары көмөштөр, ҡәләмдәре уның ҡамыштыр* (Халыҡ йырынан). **Ҡәләм һауыты** *ҡар.* **ҡәләм. Төпсөк һауыты** тәмәке тартҡанда көлөн һәм төпсөгөн һала торған һауыт. *Моратов ҡулындағы папиросын тартылып бөтмәҫтән үк алдындағы төпсөк һауытына ташланы.* А. Карнай.

**ҺАУЫТ**[2] *и.,* **һауыт кейем** Ҡорос дүңгәләктәрҙән йөйһөҙ эшләнгән боронғо яу, һуғыш кейеме. *Ырыу башлығы һамаҡлап ошоларҙы әйткән: — Ырыуҙағы ололарҙан кейәүебеҙгә һауыт бир.., ҡыҙҙарыңдың һәр беренә һарауыс менән йөҙөк бир.* «Ҡуңыр буға».

**ҺАУЫТ-ҺАБА** *и. йыйн.* Аш-һыу әҙерләү, һаҡлау һ. б. өсөн ҡулланылған төрлө һауыт; ҡашыҡ-аяҡ. *Усаҡ алдындағы бәләкәй кәштәгә һауыт-һаба теҙеп ҡуйылған.* Б. Бикбай. *Сәйҙән һуң Ғәйшә әбей һауыт-һабаны йыйып, аш өйөнә сығырға ашыҡты.* З. Биишева.

**ҺАУЫТ-ҺАЙМАН** *и. ҡар.* һауыт-һаба. *Таглыбай .. ыҫлаған тиренән төрлө аяҡ кейеме, һаба, ботлоҡ .. турһыҡ кәүек һауыт-һаймандар .. яһарға өйрәнде.* Ш. Шәһәр.

**ҺАУЫУ** *ҡ.* **1.** Имсәкте ҡыҫып елендәге һөттө ағыҙып сығарыу. *Һыйыр һауыу. Бейә һауыу. Һөт һауыу. Машина менән һауыу. Ҡул менән һауыу.* ■ *Әсәйем минең эшләй фермала, ун биш һыйырҙы бер үҙе һауа.* К. Кинйәбулатова. *Йәйләүҙәргә барҙым, бейәләр һауҙым, башҡунәкәйҙәрҙе ҡулға алып* (Халыҡ йырынан). **Имеҙеп һауыу** һыйырҙы быҙауынан имеҙеп алып, әйҙереп һауыу. **Ҡулдан һауыу** һыйырҙың быҙауын имеҙмәй һауыу.

**2.** *күсм. һөйл.* Кешене йәки берәр ойошма һ.б. табыш сығанағы итеп файҙаланыу. *Муллағәле баярҙың үйнаштан тыуған малайы менән дуҫлашып алған икән дә, уныһы сепелдек күҙле әшнәһен һауырға тотонған.* Ф. Исәнғолов.

**3.** Буйҙан-буй йәйләп тартыу, һуҙып, тартып алыу. *Һуйған малдың эсәген һауыу. Ауҙы һыуҙан һауып сығарыу.*

♦ **Ҡан һауыу** 1) ҡан тамырҙарының боҙолоуы сәбәпле тән туҡымаһының берәр еренә ҡан тулышыу. *Күҙгә ҡан һауыу. Мейегә ҡан һауыу. Ҡан һауыуҙан үлеү.* ■ *Фәхри ағайҙы шул төндө больницаға оҙаттылар. Мейеһенә ҡан һауған икән.* Я. Вәлиев; 2) *күсм.* ауыр кисерештән ныҡ әрнеү. *Ҡайғы еле ҡаҡты ҡапҡамды, йөрәгемә ҡара ҡан һауҙы.* Р. Шәкүров.

**ҺА-ҺА, һа-һа-һа** *ымл.* Үҙ-үҙендән ҡәнәғәт булып, маһайып йәки мыҫҡыл итеп көлгәндә белдерә.— *Кәләште йәнәш ултыртып еләһе генә ҡалды, һа-һа-һа!.. Буранбай ҙа уйсан ҡара күҙҙәрен йылтыратып көлөп ебәрҙе.* И. Ғиззәтуллин.

**ҺАҺАҺАЙЛАУ** *ҡ. ҡар.* иһаһайлау. *Йоҙроҡтарын төйгән Сафуан һаһаһайлап көлөп Ғәйзуллаға ҡарай атланы.* Я. Хамматов.

**ҺАҺЫЛДАУ** *ҡ.* Һа-һа тип ҡысҡырып көлөү. *Һаһылдап көлөү.* ■ *Рогаткин һаһылдап көлөп алды ла Әхтәмдең яурынына дуҫтарса ҡулын ҡуйҙы.* В. Исхаков.

**ҺАҺЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **һаһылдау.**

**ҺАШТАМА: һаштама һалыу** *диал.* Һоранып, әрһеҙләнеп йөрөү. *Һаштама һалып йөрөү.*

**ҺАЪ-ҺАЪ** *ымл.* Бейегәндә дәрт биреп әйтелгән һүҙ. *Ул егет орсоҡ шикелле өйрөлә. Бейеү араһында «әйт шуны, һаъ-һаъ» тигән һүҙҙәрҙе лә ҡушып ебәрә.* Т. Хәйбуллин.

**ҺАЯҠ** *с.* Менелмәй, егелмәй, өйөрҙән айырылып үҙ яйына яңғыҙ йөрөгән (йылҡы малына ҡарата). *Һаяҡ мал. // [Ҡаныш:] Таһыл менеп китте, ат әйәрләп, һанайым тип йылҡы һаяғын.* Х. Ғәбитов.

● *Йылҡының һаяғын алғанса, ҡуйсының таяғын ал.* Әйтем.

**ҺАЯУҺЫҘ** *с. диал.* Һарауһыҙ.

**ҺЕ** *ымл.* **1.** Бер эш-хәлгә аптырағанды белдергәндә әйтелә. *[Ныязғол:] Һе, ниңә улай тиһең, Тимерғәли ағай?* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Кешенең һүҙенә, эш-ҡылығына кире мөнәсәбәт белдергәндә әйтелә. *[Исмәғил — Булатҡа:] Һе, оялаһыңмы? Намыҫың юҡ икән һинең.* К. Кинйәбулатова.

**ҺЕБӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Яҡшы эште билдәләп йәки берәй нәмәгә арнап бирелгән бүләк. *Ул [Әхмәҙи] һабан туйҙарында, йыйындарҙа көрәшеп, һебәләр .. алған.* Ж. Кейекбаев. / Килен күренесенә ҡаршы әйтелгән бүләк.

**2.** Малдың бөйөрө янындағы ҡыҫҡа ҡабырғаһының ите (иң һәйбәт ит тип еңеүсегә бүләк итеп бирелә торған булған). *Һебә алыу. Туйҙа һебә өсөн көрәшеү.* ■ *Ибраһим һебәне алып, үҙенең ағаһы Ҡолмой байға тартты.* М. Буранғолов. **Ҡубаға һебә** йылҡының бөйөрөнә тоташҡан ҡыҫҡа ҡабырғаһы. *Суртан һыртлы, тар бөйөр, ҡубаға һебә, ҡуян бот, текә тояҡ, ас яңаҡ, үҙе төҫкә ат шулай.* М. Буранғолов. **Һебә ҡабырғаһы** күкрәк һөйәгенә тоташмаған йомшаҡ итле 11—12-се ҡабырғалар. *Көрәштә йығыусы батырға һебә ҡабырғаһы, йығылыусы батырға муйын һөйәге бүләк итеп бирелә.* М. Бураиғолов. **Туй һебәһе** 1) туй, йыйын һ. б. ярыштарҙа еңеүсегә

бирелә торған малдың бөйөрө янындағы ҡыҫҡа ҡабырғаһының ите. *Туй һебәһе өсөн көрәш башлауҙан элек ҡыҙ ҡушаматы үҙе исеменән көрәшсе батырҙар һайлай.* М. Буранғолов; 2) туй йолаһы буйынса үткәрелгән ат сабышында еңеүсе ҡыуып етеп алһын өсөн дуғаға бәйләнгән туҡыма киҫәге. **һебә апҡасыу** туйҙа ҡоҙаларҙы ҡаршы алғанда туй һебәһен алыу өсөн үткәрелгән ат сабыштырыу (ҡоҙалар килгәнен күреү менән берәүҙе дуғаһына һебә бәйләнгән ат менән ҡаршы ебәрәләр. Ул ҡоҙаларға барып күренә лә кире әйләнеп саба, артынан ҡоҙалар кемуҙарҙан сабышып һебәне алырға тырышалар. Кемдең аты шәп сапһа, шул һебәне ала ла ауылға беренсе булып килеп инә).

**ҺЕБӘЛЕК** *и. кар.* **һебә** 2. *Ҡыҙ бер ҙә гәрләнмәй таҙ менән бер табаҡтан һебәлеген ашай* (Әкиәттән).

**ҺЕҘ (һеҙҙең, һеҙгә, һөҙҙе, һеҙҙән, һеҙҙә)** *зат а.* Бер нисә, күмәк кешегә өндәшкәндә һәм әҙәплелек һүҙе булып бер кешегә өндәшкәндә ҡулланыла. *Тыңлағыҙ һеҙ, йәмәғәт, боронғоларҙан аманат, уға итһәгеҙ хыянат, һеҙгә булыр яманат* (Әйтештән).

**ҺЕЙГӘК** *с. һөйл.* **1.** Йоҡлағанда һейеп ятҡан йәки һейҙеген тота алмаған, күп һейгән. *Һейгәк бала. Һейгәк булыу.*

**2.** *кусм.* Юҡҡа-барға илап, зарланып йөрөгән. *Һейгәк ҡатын.*

**ҺЕЙГӘКЛӘҮ** *к. һөйл.* **1.** Туҡтауһыҙ һейеү, кес итеү.

**2.** *кусм.* Юҡҡа-барға зарланып, кемделер насарлап ризаһыҙлыҡ менән һөйләнеү. *Һейгәкләп йөрөү.* ■ *Уға [ҡоҙағыйға] тейер килен түгел, уға нигә һейгәкләй* (Сеңләүҙән).

**ҺЕЙҘЕК** *и.* Матдәләр алмашыныу арҡаһында бөйөрҙән бүленеп сығарылып, организмдан кесе яраү менән сыға торған шыйыҡлыҡ; бәүел. *Һейҙек ҡыуығы.* ■ *Зарарлы продукттарҙың күбеһе һейҙек һәм тир менән тик иретмә хәлендә бүленеп сыға.* З. Заһидуллин.

**ҺЕЙЕҮ** *к.* Организмдан һейҙекте сығарыу, кесе яраү итеү; кес итеү.

**ҺЕЛКЕНДЕРЕҮ** *к. кар.* **һелкетеү.** *Ел ағас япраҡтарын һелкендерә.*

**ҺЕЛКЕНЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **һелкенеү.**

**ҺЕЛКЕНЕҮ** *к.* **1.** Бер урында торған көйө тегеләй-былай ҡуҙғалыу, киҫкен ҡалтыранып алыу. *Беҙҙең окоп алдына бер снаряд төштө.. Блиндаж һелкенде.* Д. Юлтый.

**2.** *кусм. һөйл.* Эш, хәрәкәткә ҡуҙғалып, бер тына нимәлер эшләп алыу. *Һелкенеп алыу. Бер һелкенеп бейеп алдыҡ.*

♦ **Дер һелкенеү** ныҡ һелкенеү. *Ҡамыр батыр менән дейеү алышҡанда ҡала дер һелкенеп торған* (Әкиәттән). **Мейе һелкенеү** *кар.* **мейе** I.

● *Ел өрмәй ҡурай һелкенмәй.* Мәҡәл. *Эшләгәндә йөрәгең елкенһен, ашағанда ҡолағың һелкенһен.* Әйтем.

**ҺЕЛКЕТЕҮ** *к.* **1.** Тегеләй-былай ҡуҙғатыу, киҫкен ҡалтыратыу. *Ярынды һелкетеү. Һелкетә баҫыу. Һелкетә тартыу.* ■ *Ул [Усманғәле] өйгә инде лә ағаһының ҡулын һелкетеп күреште.* Ғ. Дәүләтшин. *Йомшаҡ иҫкән ел үләнде аҡрын-аҡрын һелкетә.* Ш. Бабич.

**2.** *кусм. һөйл.* Эш-хәрәкәткә көс, дәрт менән ҡуҙғатыу. *Комсомол!.. Был көрәштә, әйҙә, һелкет донъяны!* Б. Ишемғол.

♦ **Дер һелкетеү** 1) ныҡ һелкетеү. *Көнһылыу әбей, йәш килендәр кеүек, урындыҡты дер һелкетеп ҡамыр баҫа.* К. Ибәтуллин; 2) геү-шау килтереү, ҙур тынысһыҙлыҡҡа төшөрөү. *Телә һәм, бөтә йыһанды дер һелкетер кеше мин.* С. Ғәбиҙуллин; 3) ныҡ ҡурҡытыу, ҡалтыратыу. *Ялбыр башлы бер бисә ирмен тигән ирҙе дер һелкетә.* Б. Бикбай. **Ер һелкетеү** бик көслө, бик шәп хәрәкәт итеү; ярһыу. *Ер һелкетеп бейеү. Ер һелкетеп сабыу.*

**ҺЕЛКЕҮ** *к.* Киҫкен итеп, тегеләй-былай ҡуҙғатыу. *Ҡулдан тотоп һелкеү.* ■ *Ул [Сергеев] шатлығынан минең яғанан тотоп һелкә башланы.* Д. Юлтый. *Миҙхәттең әсәһе теге бисәнең ҡулынан сеүәтәне һелкә тартып алды.* Н. Мусин. **Баш һелкеү** нимәгәлер ризалыҡты йәки ризаһыҙлыҡты белдереп башты ҡағыу йәки сайҡау. *Ул [Фәтиә] «ярай» тигән һымаҡ итеп башын һелкте лә .. үҙ юлына китте.* Т. Йәнәби. / Сүп, туҙан һ. б. төшөрөү өсөн нимәнелер киҫкен хәрәкәт менән һелтәп ҡапыл ҡуҙғатыу, ҡағыу, һелкеп ебәреү. *Һелкеп ташлау. Һелкеп төшөрөү.* ■ *[Ҡатын — иренә:] Бына был токсайҙы ал, һелккән һайын аҡса ҡойолор* (Әкиәттән).

**ҺЕЛКЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **һелкеү.** *Ҡулдан тотоп һелкешеү.*

**ҺЕЛКӘҮ** *к. диал. кар.* **һелкеү.**

**ҺЕЛКӘҮЕС** *и.* Төйгән ярманы һелкеп, кәбәген айыра торған йәйпәк ялғаш. *Ҡаҙанда ҡайнатып киптергән һолоно .. килегә һалып төйәләр. Төйөлгәнен һелкәүескә һалып һелкә-һелкәләр ҙә килегә кире һалып төйәләр.* Я. Хамматов. / Он иләй торған киң ағас һауыт.

**ҺЕЛПЕ** *и. диал.* Өпрәк.

**ҺЕЛТЕ** *и.* **1.** Ҡайын көлөн ҡайнатып яһаған тонoҡ; көл тоноғо. *Һелте ҡайнатыу. Һелте менән кер йыуыу.* ■ *[Гөлдәргә Гөлгәйшә:] Ана һабын киҫәге. Һелте лә ҡайнатып бирәм, йыу керҙе.* К. Кинйәбулатова.

**2.** *хим.* Тоҙ менән кислота ҡушылғандан барлыҡҡа килгән һыуҙа ирей торған матдә.

**ҺЕЛТЕРӘҮ** *к. диал.* Ҡалтырау.

**ҺЕЛТӘМ** *и.* Бесән сапҡанда һ. б. эштә ҡул һелтәп алған аралыҡ һәм шул аралыҡты күрһәткән үлсәм берәмеге. *Бер һелтәм ер.* ■ *Айһай бейек икән.., тине Исмаҡаев. Ҡарт боронғоларса итеп тауҙың бейеклеген әйтте: .. тұғыҙ сыбыртҡы һелтәм был еренең бейеклеге,— тине.* Ж. Кейекбаев. *Хәтфә болон эсендә бер һелтәм саба алманым.* Ғ. Сәләм.

**ҺЕЛТӘНЕҮ** *к.* Киҙәнеп, нимәнелер тегеләй-былай һелтәү. *Теге һалдат ҡамсыһын күтәреп, тағы ла һелтәнгәйне, кемдер уның ҡулын тотто.* Ш. Насыров.

**ҺЕЛТӘҮ** *к.* **1.** Төрлө яҡҡа төрлө хәрәкәт яһау, болғау. *Ҡапыл бер яҡҡа һелтәү. Ҡамсы һелтәү. Ҡулды һелтәп атлау.* ■ *Зөбәниҙәр һелтәп гөрзөй-суҡмар, болоттарҙы бутай, ҡуйырта.* Ш. Бабич.

**2.** Ҡоралды үткер яғы менән бер нәмәгә сабыу. *Балтаны һелтәү. Ҡылысты һелтәү.* ■ *Һалмаҡ ҡына һелтәп, ҡайырып, һалам ҡуҡ үләндең*

*куйы ерҙәрен.* С. Ғәбиҙуллин. / Киҙәнеп ырғытыу, бәреү. *Таш һелтәү.* ■ *Һағынбай икеһенең ягаһынан алып, Миңнулла менән Кәбирҙе ике якка һелтәп ебәрҙе.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** Киҙәнеп һуғыу. *Таяк менән һелтәү. Һелтәп ебәреү.* ■ *[Янғол] стражниктарға уңлы-һуллы һелтәп, баҫкыстан .. һикереп төшөп китте.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** *күсм. һөйл.* Кеше нәмәһен һорамай алып китеү. *Ғәбдрәшит ағайымдың .. иң матур һүрәтен һелтәнем дә ыскындым.* Т. Килмөхәмәтов.

**5.** *күсм. һөйл.* Тиҙ ҡапыл күтәреп эсеп ебәреү. *Кунактар тағы урындарына ултырыша, тағы берәрҙе һелтәйбеҙ.* Й. Солтанов.

♦ **Кул һелтәү** *кар.* **кул** [1].

**ҺЕЛӘ** *и.* Күкрәктең аҫҡы өлөшө; күкрәк ауыҙы. *Кешенең һеләһенә һыкһаң, тын ала алмай.*

♦ **Һелә катыу** тын ҡыҫылыуы; һын ҡатыу. *Һелә катканса көлөү.* **Һелә короу** *шул ук* **теңкә короу** (*кар.* **теңкә**). *Көл түгә-түгә һелә корой.* **Һеләһеҙ булыу** тәҡәтһеҙ булыу. *Һеләһеҙ булып көлөү.*

**ҺЕЛӘГӘЙ** *и.* Шылағай, шайыҡ, шелгәй. *Ул [үгеҙ] шул саклы сабыуҙан, һыҙланыуҙан тамам йонсогайны. Башын да күтәрә алмай, ауыҙынан туктауһыҙ һеләгәй аға.* М. Кәрим.

**ҺЕЛӘҮКӘЙ** *и. диал.* Селәүсен.

**ҺЕЛӘҮҺЕН** *и.* Беҫәйҙәр ғаиләһенә ҡараған һарғылт һоро төҫтәге йыртҡыс йәнлек. *Һеләүһен агас башынан үҙ табышына һикерә.* ■ *Кормош бай һеләүһен тиҙлеге менән .. арттан уның [Байгилдененең] башына тондорҙо.* З. Биишева.

**ҺЕМГЕРЕҮ** *к.* Танау эсендәге һауаны ҡапыл өрҙөрөп, танау эсен лайлалы шыйыҡсанан таҙартыу. *[Фәтхетдин] уң кулының баш бармагы менән танауының бер як япрагын баҫып һемгерҙе.* А. Таһиров.

**ҺЕМЕРЕҮ** *к.* Шыйыҡ нәмәне тын менән ауыҙға һурыу. *Һемереп эсеү.* ■ *Шаһгәле сәйен тиҙ-тиҙ генә һемерҙе лә сынаягын түңкәрҙе.* Ш. Янбаев.

**ҺЕММ** *ымл.* Кем йәки нимә менәндер риза булыу, маһайыу йәки киреһенсә, риза булмау, икеләнеү, аптырауҙы белдереп әйтелгән һүҙ. *[Кормой:] Һемм, Якуп старшина уҫал бүре булһа, мин карт төлкө әле.* Б. Бикбай. *Был һүҙҙәр бабайҙың бик нык хәтерен калдырҙы күрәһең. Ул һемм тип аҫкы иренен тешләне.* И. Ғиззәтуллин. *[Билал:] Тимәк, һеҙ каршы түгел .. Сафар: Мин? Һемм.. юк.* З. Хисмәтуллин.

**ҺЕМТЕЙМӘҪ** *с. диал.* Һөмһөҙ, йүнһеҙ.

**ҺЕМТӘНЛӘҮ** *к.* Эшһеҙ, ниһеҙ унда-бында ҡағылыу, йөрөү; темеҫкенеү. *Һемтәнләп йөрөү.* ■ *Һыйыр һемтәнләп килеп, .. баҙга төшкән дә киткән.* И. Ғиззәтуллин.

**ҺЕМҺЕНЕҮ** *к. диал.* Ымһыныу.

**ҺЕМӘЙЕҮ** *к.* Нимәлер өмөт итеп, буш ҡалыу. *Һемәйеп калыу.* ■ *[Накышев:] Ауыҙга төшкән байлыктан колак какканга үкенәм .. һемәйҙем бит. Нык һемәйҙем!* Я. Хамматов.

**ҺЕМӘЙТЕҮ** *к.* Кешене ниндәйҙер өмөтөнән, ышанысынан буш ҡалдырыу. *[Миһран — Иҙелгә:] Кыҙҙан колак какканыңды һиҙмәй ҙә калдыңмы? Һинең һымактарҙы шулай һемәйтәләр уны.* Ш. Насыров. *Хайран гына булам был донъяга, һемәйтә бит донъя күптәрҙе* (Халыҡ йырынан).

**ҺЕМӘК** *и.* Төрлө нәмәләрҙең бороп, шыйыҡлыҡ ағыҙа торған мороно. *Самауыр һемәге. Сипарат һемәге. Сәйгүн һемәге.* ■ *Самауырҙың һемәге ага бит әле. Бер самауыр күяйым тиһәң, ыҙаланып бөтәһең, әйтәгүр.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҺЕМӘЛӘЙ** *с. диал.* Кәүҙәгә ҙур, әҙмәүерҙәй, уҫлаптай. *Карт-королар һыҙырып эшләгәндә, тау-таш емерерлек һемәләй ир өйҙә ултырһын имеш.* А. Игебаев.

**ҺЕН** *и.* Иҫ, тойғо.

♦ **Һен китеү** иҫтән яҙыу. **Һен катыу** иҫте, тойғоно юғалтыу. *Һене катып илай. Һене катып көлә.* **Һен короу** иҫ китеү. **Һен тейеү** күңелгә ятыу, оҡшау. *Башта уга [егеткә] ниңәлер һенем теймәне, әллә нимәһенә һөйкөмһөҙ күренде.* Р. Солтангәрәев. **Һен ағас** хәрәкәтһеҙ, ҡатып ҡалған нәмәгә әйтелә. *Болоттар һен агас булып катып тора.*

**ҺЕҢ** *и. диал.* Йылым. *Атакайымдың аттары һең алганда сыккан балыктай* (Сенләүҙән).

**ҺЕҢГӘҘӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **һеңгәҙәү**. *Һеңгәҙәтә һуғыу.*

**ҺЕҢГӘҘӘҮ** *к.* **1.** Ҡаты бәрелеү, һуғылыуҙан иҫтән, хәлдән яҙып, ҡуҙғала алмаҫ хәлгә килеү. *Һеңгәҙәп ятыу.* ■ *Хәмиҙуллага иҫ киткес каты нәмә менән һуктылар. Ул һеңгәҙәп китте. Кайҙалыр осоп барган һымак тойҙо үҙен.* Р. Солтангәрәев.

**2.** *күсм.* Ауырыу, ҡаты эш, ныҡ йонсоуҙан ҡаңғырып йәки берәр хәлдән аптыранып, иҫһеҙ һымаҡ булыу. *Һеңгәҙәп йөрөү. Һеңгәҙәп ултырыу.* ✉ *Емеш тә, хатта көрән бейә лә, күрәһең, аптырауҙан үҙҙәре өсөн төптө аңлашылмаган ығы-зығынан тамам арып, һеңгәҙәп бара.* З. Биишева.

**ҺЕҢДЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **һеңдереү**. *Ыҫмала һеңдерелгән бүрәнә.* ■ *«Тере ут" тигәндәре махсус уктар булган. Атыр алдынан уларга ыҫмала һеңдерелгән сүс, сепрәк бәйләгәндәр һәм уга ут төрткәндәр.* Д. Бураҡаев.

**ҺЕҢДЕРЕҮ** *к.* **1.** Шыйыҡ йәки газ хәлендәге нәмәне үтәнән-үтә эскә тартыу; һурыу. *Еҫ һеңдереү. Дым һеңдереү.* ■ *Тышта ямгыр яуып тора.., һибәләп кенә яуа, һеңдереп яуа.* Я. Вәлиев. / Ниндәйҙер шыйыҡлыҡты бер нәмәгә үтәнән-үтә үткәреү; һурҙырыу. *Мамыкка дарыу һеңдереү.*

**2.** Ашаған, эскән аҙыҡты үҙләштереү. *Юлдыбикә әбей үпкәһе йөҙгәнсе эселгән сәйҙе һеңдереү яйы менән аяктарын һона төшөп ян-ягына каранды.* Т. Хәйбуллин. *Хәким Ғәлимәгә асыуланды: — Эс һеңдереп нигә борголандайың? У! Тик кенә ултыр.* Я. Хамматов.

**3.** *күсм.* Нимәнелер аңлап иҫтә ныҡ ҡалдырыу. *Башка һеңдереү. Хәтергә һеңдереү.* ■ *Ауыҙымдан сыккан бер һүҙҙе йотоп алып, күңелдәренә һеңдереп ултырҙылар.* И. Абдуллин.

**4.** *күсм. һөйл.* Йәшерен рәүештә үҙләштереү, урлау. *Шәңгәрәй ике-өс тапкыр .. арзанлы тауарҙарҙы оҫта гына һеңдерҙе.* С. Агиш.

**5.** *күсм. һөйл.* Нимәгәлер ҡуша лапаштырыу, ялпаштырыу; батырыу. *Ергә һендерә һуғыу.* ■ *Ярты донъя урап, өйгә ҡайттым, ике һуғыш утын һүндереп, дошманымдың һырт һөйәген ватып, доморкторөп, ергә һеңдереп.* Х. Кәрим.

◆ **Һеңдерә һуғыу** нык, ҡаты һуғыу. *[Урал батыр:] — Дейеүҙе мин ергә һеңдерә һуктым, тигән.* «Урал батыр». **Һеңдерә әйтеү** нык ҡаты әйтеү. *Алпаров ярты-йорто һөйләшә белмәй .. Ғәҙәтенсә, тауышын күтәрмәй генә, һәр һүҙенә баҫым яһап, һеңдерә әйтте.* Я. Вәлиев.

**ҺЕНДЕРЕҮСӘНЛЕК** *и.* Һендереү (1—3 мәғ.) һәләте. *Тупрактың дым һеңдереүсәнлеге.*

**ҺЕҢЕЛ** *и. диал.* Һеңле.

**ҺЕҢЕР** *и.* Быуындарҙы тоташтырып торған һары төҫтәге лайлалы нык масса, туҡыма. *Төхвәт уға [яралыға] яҡынырак шыуҙы: — Һөйәккә эләкмәгәнме? тине. [Яралы:].. Тик бына шуныһы насар — баҫып булмай. Һенер өҙөлгән самаһы.* Й. Солтанов. *Ул [Зәки] тешен ҡыҫып, .. һеңерҙәрен ҡатырып, көрәшкә әҙерләнде.* А. Таһиров.

**ҺЕҢЕРЛЕ** *с.* Һеңере күп. *Һеңерле ит.*

**ҺЕҢЕҮ** *ҡ.* **1.** Берәр нәмәнең эсенә үтәнән-үтә тартылыу, үтеп инеү, һурылыу, (шыйыҡ йәки газ хәлендәге нәмәгә ҡарата). *Еҫ һеңә. Төтөн һеңә.* ■ *Бер гөл булып ҡалкты таңда ергә кисә һеңгән тамсы.* Р. Назаров. *Баҫыуҙарға һеңә ҡар һыуы.* Н. Иҙелбай.

**2.** Ашаған, эскән аҙыҡ үҙләштерелеү. *Көнөнә бер елдереп, әҙерәк тирләтеп алмаһаң, ашағаны тәненә һеңмәй.* Б. Бикбай.

**3.** *күсм.* Күңелдә ныҡлап урынлашыу, иҫтә нык ҡалыу. *Йөрәккә һеңеү. Хәтергә һеңеү.* ■ *Бала саҡтан күңеленә һеңеп ҡалған бер хикәйәт Усмановты күп уйландыра.* Ғ. Вәлиев.

**4.** *күсм. һөйл.* Урланып үҙләштерелеү. *Мәсет-мәҙрәсә килемдәре, хәйер-саҙаҡа уның [Әптелгәлимдең] кеҫәһенә инеп, .. һеңә бара.* Ф. Иҫәнғолов.

**5.** *күсм. һөйл.* Лапашып, аҫҡа батыу. *Ғаббас мулланың бер мөйөшө сереп, ергә һеңгән мәҙрәсәһе мәктәп өсөн яраҡһыҙ булып сыҡты.* З. Биишева. *Урал уны ҡапыл элеп алып, йә'. асыуы менән шул хәтле атып бәрҙе, ти, дейеү ергә һеңде лә ҡуйҙы, ти.* «Урал батыр».

◆ **Ҡанға һеңеү** *ҡар.* **ҡан** [1].

**ҺЕҢЕШЕҮ** *ҡ. көс. ҡар.* **һеңеү** 1, 3, 5. *Йөрәккә һеңешеү. Күңелгә һеңешеп ҡалыу.*

**ҺЕҢЕШЛЕ** *с.* Үҙләштереү өсөн еңел (аҙыҡҡа ҡарата). *Һеңешле аҙыҡ.*

**ҺЕҢК** *окш.* Ҡапыл һуғылғанда ҡапыл ҡаҡлығып бәрелеп алыуҙы белдереп әйтелгән һүҙ. *Һеңк итеп ҡалыу. Һеңк итеп барып төшөү..* ■ *Сураман Асылы буйы батырын йәлп итеп баш аша һелкеп ебәреүе була, теге батыр һеңк итеп ергә барып төшә.* Ғ. Хөсәйенов. *Батша һеңк итеп ергә ултыра ла: — Ҡуй, егет .. Алып китә күр айыуҙарыңды, донъямды харап иттермә! — ти* (Әкиәттән).

**ҺЕҢКЕЛДӘТЕҮ** *ҡ.* Нимәнелер туҡтауһыҙ һелкетеү, һеңк иттереү. *Һеңкелдәткәнсә ергә алып бәреү. Һеңкелдәтә баҫыу.* ■ *Башкынайым минең нык ауырта, һеңкелдәтмә минең көймәмде* (Халыҡ йырынан).

**ҺЕҢКЕЛДӘҮ** *ҡ.* Туҡтауһыҙ һелкенеп тороу. *Күмәкләшеп бейегәндә иҙәндәре һеңкелдәй* (Халыҡ йырынан).

**ҺЕҢЛЕ** *и.* Үҙеңдән кесе ҡыҙ туған; һеңлекәш. *«Ағакайым»,— тип әйләнеп, һикереп йөрөй һеңлекәй.* Ш. Бабич.

◆ **Ейән һеңле** *ҡар.* **ейән.**

**ҺЕҢЛЕКӘШ** *и. һөйл.* Үҙеңдән кесе ҡатын-ҡыҙ һәм уға өндәшеү һүҙе. *Яңы шиғырҙарым килгәс газетала баҫылып, һеңлекәшем ошо шат хәбәрҙе атайыма әйткән ашығып.* Т. Арслан.

**ҺЕҢРӘҢ** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме (ҡатай ырыуына инә).

**ҺЕПЕРЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* һепереү. *Һеперелгән иҙән.*

◆ **Һеперелеп йөрөү** оятһыҙ рәүештә теләһә кем менән бәйләнешкә инеү. *[Ҡайныһы Гөлйөҙөмгә:].. Тьфу?! Ирҙәүкә, оятһыҙ! Һеперелеп йөрөйһөң шунда иһаһайлап.* Ф. Иҫәнғолов. **Һеперелеп сығыу** күмәкләп, бер юлы сығыу. *Һеперелеп тышҡа сығыу.* **Һеперелеп эшләү** өнһөҙ-һүҙһеҙ баш баҫып эшләү. *Минең ҡыҙым һеперелеп эшләп тик йөрөй.* Н. Мусин.

**ҺЕПЕРЕҮ** *ҡ.* Һепертке менән һыпырып, сүп-сарҙан таҙартыу. *Иҙән һепереү. Урам һепереү.* ■ *Ишек алды тап-таҡыр итеп һепереп ҡуйылған.* Ғ. Дәүләтшин. *Гөлйөҙөм атаһының ырҙын төбөнән һепереп йыйып ҡуйған тауыҡ емлеген .. арбаға һалды.* Һ. Дәүләтшина.

◆ **Сәс менән ер һепереү** *ҡар.* **сәс** [1]. **Һепереп** түгеү тотош юҡ итеү. *[Хафиз:] Беҙҙең бәхетебеҙ дошманды ер йөҙөнән һепереп түгеүгә бәйләнгән.* Х. Кәрим.

**ҺЕПЕРЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* һепереү. *Иҙән һеперешеү. Урам һеперешеү.*

**ҺЕПЕРТЕҮ** *ҡ.* **1.** *йөкм. ҡар.* **һепереү.** *Иҙән һепертеү.*

**2.** *күсмл.* Бер йүнәлештә ер өҫтөнән аҫтан ғына ҡарҙар осороу. *Көндөҙ һепертеп кенә башланған буран киҫкә табан көсәйҙе, өҫтән ҡар яуа башланы.* Ә. Вәли.

**ҺЕПЕРТКЕ** *и.* Сыбыҡ йәки сыбыҡ һымаҡ нәмәләрҙән бергә бәйләп яһалған һеперә торған нәмә. *Селек һепертке. Урам һеперткеһе. Һепертке һабы. Һепертке бәйләү.* ■ *Сәғиҙә ҡулына һепертке алып, йорт тирәһендәге, ҡойма буйҙарындағы сүп-сарҙы һеперергә тотондо.* М. Тажи.

**ҺЕПЕРТКЕБАШ** *и.* Ҡыяҡлы үләндәр ғаиләһенә ҡараған ялбыр сәскәле, бер йыллыҡ ҡый үләне.

**ҺЕПЕРТМӘ:** **һепертмә буран** (*ҡар.* **буран 1**).

**ҺЕПТЕК** *и. диал.* **1.** Ҡый, сүп. *Һептек өйөлөп киткән, түгергә кәрәк.*

**2.** *күсм.* Йүнһеҙ, насар кеше.

**ҺЕР:** **һер итеү** *диал.* рөхсәт итеү. *Һер иткәнде лә көтмәйенсә итте һоғона башланылар.* Ғ. Ишбулатов.

**ҺЕРЕ** *с.* **1.** Ауырлыҡҡа бирешмәй торған түҙем, сыҙамлы. *Һере кеше. Һере булыу.* ■ *Мин бирешмәм. Ҡыҙ кеше һере була ул. Бер аҙ ял иткәс, ҡыуып етермен.* Н. Мусин.

**2.** Сабыр, нык характерлы, түҙемле холоҡло. *[Анна:] Ул ..бер ни ҙә һөйләмәй. Хатта фамилияһын да әйттереп булманы. Иҫ киткес һере малай.* З. Биишева. *Ҡыҙған малай, ҡыҙарынған*

*биттәренән аға тире, тик һыр бирмәй ҡыуа ғына, ҡара уны ниндәй һерә!* В. Әхмәҙиев.

♦ **һерә холоҡ** кеше һүҙен һис тыңламаған. **Эреһе бөтөп, һереһе ҡалған** донъяны күп күргән, тормоштоң әсеһен-сөсөһөн күп татып ныҡынған, сыныҡып бөткән, хәҙер ул бирешмәҫ тигән мәғәнәлә ҡулланыла.

**ҺЕРЕЛӘНЕҮ** *ҡ. һөйл.* Кешенең әйткәненә, әрләгәненә иғтибар итмәү, үҙһүҙләнеү.

**ҺЕРЕНТЕҮ** *ҡ.* Туҙыу, ҡаҡшау, бәлтерәү. *Һерентеп бөтөү.* ■ *Ҡуйы ағастар араһынан һерентеп бөткән ҡарттар, әбейҙәр сыҡты.* Ғ. Ибраһимов.

**ҺЕРКЕЛДӘҮ** *ҡ.* Ҡурҡып тертләү; һиҫкәнеү. *Һеркелдәп тороу.* ■ *Таңатарҙың улы ҡайһылары менән килешкән, ҡайһылары менән дуҫлығын ныҡытҡан, тик барыбер күңеле һеркелдәп кенә торған.* Ә. Вахитов.

**ҺЕРКӘ** [1] *и.* **1.** Әсе, ҡырҡыу еҫле, төҫһөҙ шыйыҡлыҡ (аш-һыуҙа ҡулланыла). *Беҙҙең күрше Сәлимә яңылыш һеркә эсеп ағыуланып, өс көн ятты.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** *һөйл.* Шыттырылған арпаны ҡайнатып, бал менән әсетелеп, дауа итеп ҡулланылған шыйыҡлыҡ. *Һеркәне сиҡан, шешек сыҡҡанда эсәләр.*

**ҺЕРКӘ** [2] *и.* Беттең йоморткаһы.

♦ **һеркәһе һыу күтәрмәй** тәнҡит, шелтәне ҡабул итә белмәгән, үпкәсел. *[Әсәйем Рабиғаға:] Ә һин артыҡ үҙһүҙләнең, мин һиңә әйтәйем. Саҡ ҡына булһа, һеркәң һыу күтәрмәй. Тәртәң мурт.* Я. Вәлиев.

**ҺЕРКӘ** [3] *и.* Сәскәле үҫемлектәрҙең саң кеүек ваҡ ҡына аталыҡ орлоғо. **Һеркәгә** (*йәки* **һеркәлә) ултырыу** үҫеү осоронда ваҡ ҡына сәскәләр — орлоҡ сығарыу (игендәргә ҡарата). *Арыштар һеркәлә ултыра, һабан ашлыҡтар ҙа күптән ер ябып, быуынға һикерә башланы.* Ғ. Шәрипов. **Һеркә осороу** үҫемлектең сәскәһендә еме — орлоғо барлыҡҡа килә башлау менән сәскәләре ҡойолоу (игендәргә ҡарата). *Алыҫта арыш баҫыуы өҫтөндә ап-аҡ томан йөҙә — арыш һеркә осора.* Т. Килмөхәмәтов. *Етте матур саҡтар!.. Баҫыуҙарҙа арыштар талғын ғына тулҡынланып һеркә осора.* Р. Ғабдрахманов.

♦ **Саң һеркә** бәшмәк, мүк кеүек үҫемлектәрҙең бик ваҡ орлоғо. **Һеркә үләне** *шул уҡ* **көтөүсе муҡсаһы** (*ҡар.* **муҡса**).

**ҺЕРКӘЛЕ** [1] *с.* Һеркә [1] ҡушылған. *Һеркәле һыу.*

**ҺЕРКӘЛЕ** [2] *с.* Һеркәһе [2] бар, һеркәләгән. *Килен алырға килгән ҡоҙағыйҙың ике һамайы һеркәле* (Сеңләүҙән).

**ҺЕРКӘЛӘНДЕРЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **һеркәләндереү.** *Һеркәләндерелгән арыш.*

**ҺЕРКӘЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Үҫемлектәрҙе һеркә [3] менән аталандырыу; һеркәләтеү. *Бөжәктәр араһында үҫемлектәрҙе һеркәләндерә торғандары ла бар.* ■ *Бал ҡорттары сәскәнән сәскәгә йөрөп сәскәләрҙе һеркәләндерә.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҺЕРКӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Һеркә [3] менән аталаныу. *Сокор урында иген һабаҡҡа бик шәп үҫә. Ләкин иртә йығыла, шул арҡала йүнләп һеркәләнә алмай һәм башағы бик йоҡа була.* Ә. Вәли.

**ҺЕРКӘЛӘТЕҮ** [1] *ҡ.* Һеркәлегә [2] әйләндереү, һеркәле итеү. *Башты һеркәләтеү.*

**ҺЕРКӘЛӘТЕҮ** [2] *ҡ. ҡар.* **һеркәләндереү.**

**ҺЕРКӘЛӘҮ** *ҡ.* Бет йоморткалары үрсеп, һеркәлегә әйләнеү; һеркәле булыу.

**ҺЕРПӘЙЕҮ** *ҡ. диал.* Тырпайыу, һерәйеү.

**ҺЕРПӘК** *и.* Ауыр, ҡара эшкә тотонола торған балта.

**ҺЕРӘ** *и. диал.* Бәйләнсек.

**ҺЕРӘЙЕҮ** *ҡ.* Башҡа нәмәләрҙән айырылып ҡалҡып тороу, бейек булып тороу; тырпайыу. *Һерәйеп тороу. Һерәйеп ултырыу.* ■ *Талдар юҡ инде хәҙер, яңғыҙ тирәк кенә ҡалған һерәйеп.* Ғ. Вәлиев.

**ҺЕРӘЙЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **һерәйеү.** *Һерәйешеп тороу.* ■ *Һерәйешеп ҡалҡҡан ҡаяларҙың баштарында бөркөт балаһы.* С. Ғәбиҙуллин.

**ҺЕРӘЙТЕҮ** *ҡ.* Бейек, текә итеп ҡалҡытыу; тырпайтыу. *Ат туҡтаны, ҡолаҡтарын һерәйтеп, башын уңға борҙо.* С. Кулибай.

**ҺЕРӘНЛӘК** *и.* Буй күрһәтеп тик йөрөгән кеше.

**ҺЕРӘНЛӘТЕҮ** *ҡ.* Күҙ алдында йөрөтөү, буштан-буш күҙгә күрһәтеү. *[Карт — Зәкигә:] Йыйып ҡуй тиҙерәк шул нәмәңде [наганды] ашыҡмы ни ул һерәнләтеп йөрөтөргә.* С. Агиш.

**ҺЕРӘНЛӘҮ** *ҡ.* Эшһеҙ, сәбәпһеҙ кеше күҙ алдында сыуалыу, күренеү, буштан-буш кеше алдында күренгеләү. *Ҡул ҡутәреп һерәнләп ултырыусылар ҙа табылды.* К. Кинйәбулатова. *[Алһыу — Альбертка:] Күҙ һатып, һерәнләп йөрөмә әле, юлыңда бул.* Ғ. Ибраһимов.

**ҺЕРӘҮ** *с. һөйл.* **1.** Бешеп етмәгән; сейле-бешле, ҡаты. *Һерәү бутҡа. Һерәү икмәк. Һерәү ит.*

**2.** Тейешенсә эшкәртелмәгән; төйөрлө, эре. *Һерәү он.*

**3.** *күсм.* Һыуыҡ, сасҡау. *Һерәү көн.*

**4.** *күсм.* Кеше һүҙен ишетмәй торған, һерә. *Һерәү бала. Һерәү булыу.*

**ҺЕРӘҮЛӘНЕҮ** *ҡ.* Һерәүгә (1 мәғ.) әйләнеү, һерәү булыу. *[Рәхимә:] Ҡаҙаны ҡайнамай тора бит, ите һерәүләнә лә баһа инде.* Һ. Дәүләтшина.

**ҺЕҮ** *ымл.* Нимәлер эшләгәндә көс биреү, дәртләндереү өсөн әйтелгән һүҙ. *«Һеү, әйҙәгеҙ! Ырҙынға бәрәкәт!» — тигән булам тегеләргә.* Б. Бикбай.

**ҺЕҮЛӘҮ** *ҡ.* Һеү тип ҡысҡырыу. *Ҡапыл-ҡапыл гөрләп, һеүләп ҡысҡырған тауыштар ишетелеп ҡуя.* А. Таһиров.

**ҺЕҮМӘҘӘТ** *ымл.* **1.** Йырлағанда көй күтәреү, дәртләндереү өсөн әйтелгән һүҙ.

**2.** Ныҡ аптырағанда, ғәжәпләнгәндә әйтелгән һүҙ. *Һеүмәҙәт ҡунаҡтар килеп тә төшкән.*

**ҺЕҮӘН** *и.* **1.** Йылғаның ағын урыны; шаршы. *Йылғаның һеүән урындары.* ■ *[Чу йылғаһы] тауҙарҙы ярып, һеүән ерҙәрендә шаршылап ярһып аға ла тигеҙлектәргә .. килеп сыға.* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** Шаршыға ҡуя торған йәлдәүһеҙ мурҙа.

**3.** Тоткан балыҡтарҙы һала торған бәләкәй кәрзин.

**ҺЕ-ҺЕ** *ымл.* Бик ҡәнәғәт булып йәки мыҫҡыл итеп көлгәндә белдергән һүҙ.

**ҺИ** *ымл.* Мыҫҡыл менән һанға һуҡмай ҡарағанды белдергән һүҙ. *Ҡыҙыҡай беҙҙән көлдө: һи, алып ҡайтҡан Тархан байығыҙ ошомо әллә?* З. Рафиков.

**ҺИБЕЛДЕРЕҮ** *к.* Таратып туҙҙырыу. *Һибелдереп сәстәреңде дауыл тараһын.* М. Кәрим.

**ҺИБЕЛЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **һибеү.** *Тауыкка һибелгән ем. Ҡом һибелгән юл.*

**2.** Бөртөк-бөртөк булып, туҡтауһыҙ төшөп тороу, күп булып ҡойолоу. *Ап-аҡ сәскәләр шикелле, ҡар һибелә ҡырҙарға.* А. Игебаев. / Берәр ерҙән сығып таралыу, бөркөлөү (нур, яҡтылыҡ һ. б. ҡарата). *Күккә күтәрелгән корпустарҙан асфальттарға нурҙар һибелә.* Х. Ҡунаҡбай. *Ҡараңғыла сабын эстәрендә ут ялтырай, яҡты һибелә.* Ғ. Мәсғүт.

**3.** Төрлө яҡҡа туҙып таралыу. *Һибелеп ятыу.* ■ *Балалар сыр-сыу килеп, төрлөһө төрлө яҡҡа һибелде.* Ә. Байрамов. *Ә беҙ күп инек, утлы һыҙыҡ буйлап һибелдек.* Н. Нәжми.

**4.** Туҙып таралып төшөү, таралыу (сәскә ҡарата). *Уның [Айбулаттың] ҡара ҡуйы сәстәре түгелеп маңлайына һибелделәр.* Һ. Дәүләтшина. *Сәсем һибелә, сәсем һибелә, һибелеп бөтә инде* (Халыҡ йырынан).

**ҺИБЕЛЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **һибелеү** 3. *Һибелешеп ултырыу.*

**ҺИБЕЛМӘ** *и. геол.* Составында файҙалы (алтын, алмас һ. б.) минералдарҙың бөртөктәре, ваҡ киҫәктәре булған ултырма. *Алтын һибелмәһе. // Һибелмә алтын.* ■ *[Ғәйзулла:] Руда, бар, руда табылыр! Һис юғында, һибелмә алтын яткылыктарын табасаҡбыҙ.* Я. Хамматов.

**ҺИБЕҮ** (һип≠) *к.* **1.** Өҫтән сәсрәтеп һирпеү (ваҡ, бөртөклө нәмәне). *Ем һибеү. Ҡом һибеү. Тоҙ һибеү.* ■ *Был ҡатын көлдө яулығына төрөп ала ла тирә яғына һибеп ебәрә* (Әкиәттән).

**2.** Төрлө яҡҡа таратыу, бөркөү (нур, яҡтылыҡ һ. б. нәмәне). *Иртә таңда һипкән нуры менән ҡояш сайҡай тағы ер-күген.* Ғ. Амантай.

**3.** Сәсрәтеп, өҫтән түгеү, ҡойоу (шыйыҡ нәмәне). *Утҡа кәрәсин һибеү.* ■ *Һыу тултырып алып сыҡтым, иҙәнгә һиптем дә, щетка менән һәйбәтләп кенә һепереп алдым.* С. Агиш.

◆ [Арттан] **көл һибеп ҡалыу** *кар.* **көл. Боҙло һыу һипкән һымаҡ** ҡапыл ҡурҡып, ҡаушап ҡалыу.

**ҺИБЕШЕҮ** *к. урт. кар.* **һибеү.** *Һыу һибешеү. Ем һибешеү.*

**ҺИБӘ** *и. кар.* **һебә.**

**ҺИБӘЛӘҮ** *к.* Ваҡ ҡына тамсы йәки бөртөк рәүешендә еңелсә эҙләп кенә яуыу. *Һибәләп тороу. Һибәләп яуыу. Һибәләп кенә ҡар яуып үтте.* ■ *Һибәләп ямғыр яуа. Ҡола ҡашҡа ҡырт-ҡырт көйшәй.* С. Кулибай.

**ҺИГЕҘ** *төп һ.* 8 һаны. *Һигеҙгә икене ҡушыу.* / Кем йәки нәмәнеңдер 8-гә тиң иҫәбе. *Һигеҙ кеше. Һигеҙ ауыл. Һигеҙ йәш.*

**ҺИГЕҘАЯҠ** *и.* Әкәм-төкәмдәр ғаиләһенә ингән оҙон һигеҙ һәрмәүесле диңгеҙ йәнлеге.

**ҺИГЕҘГҮҘ** *и.* Умыртҡа һөйәгенең оса һөйәгенә тоташҡан иң аҫҡы өлөшө.

**ҺИГЕҘЕНСЕ** *рәт һ.* Урын тәртибе 8 менән билдәләнгән. *Һигеҙенсе кат. Һигеҙенсе кеше.*

**ҺИГЕҘЛӘП** *сама һ.* Һигеҙ тирәһе, һигеҙгә яҡын. *Һигеҙләп бәрәс. Һигеҙләп кеше.*

**ҺИГЕҘӘР** *бүл. һ.* Һәр бере һигеҙгә тиң. *Һигеҙәр һум. Һигеҙәр йәш. Һигеҙәр кеше теҙелеү.*

**ҺИГЕҘӘРЛӘШЕП** *р.* Һигеҙ кеше берләшеп, һигеҙ кеше бергә. *Һигеҙәрләшеп теҙелеү.*

**ҺИДАЙӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Дөрөҫ юл. *Һидайәт биреү. Һидайәткә һалыу.* ■ *Имде ҡалған ғүмеремдә тәүфиҡ вә һидайәткә күндер.* М. Өмөтбаев.

**ҺИҘГЕР** *с.* Нимәнелер тиҙ һиҙеп, еңел аңлап торған, сос. *Һиҙгер кеше. Һиҙгер күңелле. Һиҙгер булыу.* ■ *Һыуһылыуҙың һиҙгер ҡолағы йәнә Дим яғынан сабып килгән тояҡ тауыштарын ишетә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». *Фәхриҙең .. тура өйөнә инеп сыҡҡанын хатта һиҙгер Яҡуп күрше лә абайламай ҡалды.* Б. Бикбай.

**ҺИҘГЕРЛӘНЕҮ** *к.* Һиҙгергә әйләнеү, һиҙгер булыу.

**ҺИҘГЕҮ** *к. диал.* Һиҫкәнеү. *Быны ишеткәс, Мәсем хан һиҙгеп китте, башынан ҡолаҡсыны осоп китте.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ҺИҘҘЕРЕҮ** *к.* Һиҙергә (2 мәғ.) мөмкинлек биреү, һиҙерлек итеү; тойҙороу, белдереү. *Кешегә һиҙҙермәү. Һиҙҙермәй эшләү.* ■ *Ул [Сәгиҙә] үҙенең тулҡынланыуын .. Гөлнурға һиҙҙермәҫкә тырышты, уға күтәрелеп ҡараманы.* М. Тажи. *Батша үҙенең аптырап ҡалғанын һиҙҙермәҫкә тырыша* (Әкиәттән).

**ҺИҘҘЕРМӘҪТӘН** *р. кар.* **аңғармаҫтан.** *Һиҙҙермәҫтән килеп инеү.*

**ҺИҘҘЕРТЕҮ** *к. кар.* **һиҙҙереү.**

**ҺИҘЕЛЕҮ** *к.* **1.** Кешегә, кешенең организмына тәьҫир итеү, һиҙергә мөмкин булыу, һиҙерлек булыу. *Арығанлыҡ һиҙелә.* ■ *Бик ныҡ арыу һиҙелһә лә ауырыу һиҙелмәй.* Д. Юлтый.

**2.** Нимәләр тураһында белерлек, ниҙер анларлыҡ булыу. *Баҙҙы асып ҡаранылар. Унда ла ул-был һиҙелмәне.* Б. Бикбай.

**ҺИҘЕМ** *и.* Һиҙеү тойғоһо һәм хисе, күңел менән һиҙеп, аңлау, белеү ҡеүәһе. *Матурлыҡ һиҙеме. Тел һиҙеме.*

**ҺИҘЕМЛӘҮ** *к.* Күңел менән тойоп һиҙеү. *Кешенең аяҡ тауышынан уҡ бәхетләме, түгелме икәнен һиҙемләргә була.* Ш. Янбаев. *Нәҫерҙә ниҙеңдер уяныуын һиҙемләү бар, әммә күреү юҡ.* Ә. Вахитов.

**ҺИҘЕНЕҮ** *к.* Алдан уҡ эске тойғо менән ниҙер һиҙеү, белеп алыу. *Маянһылыу һиҙенеп: «Кем былай шаяра икән?» — тип, абайлабыраҡ ҡараһа, алдында Ҡуҙыйкүрпәс баҫып тора, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҺИҘЕҮ** *к.* **1.** Эске тойғо ағзалары ярҙамында ниҙер белеү; тойоу. *Еҫ һиҙеү. Тәм һиҙеү.* ■ *Ала бесәй ит еҫен һиҙеп, шунда уҡ уның янына барып ултырҙы.* З. Биишева.

**2.** Аң, күңел менән самалап ниҙер белеү; алдан тойоу. *Кешенең уйын һиҙеү. Хәйләне һиҙеп ҡалыу.* ■ *Зирәк еңгә эштең нимәлә икәнен һиҙеп алды ла, Барсынһылыуға бер һорау бирҙе, ти.* «Алпамыша».

**ҺИҘМӘҪТӘН** *р.* Ҡапыл, көтмәгәндә, аңғармаҫтан. *Һиҙмәҫтән килеп инеү.* ■ *Хушлашып сығыр алдынан Сәгиҙә үҙе лә һиҙмәҫтән: «Бынан һуң мин уҡыта алмамдыр инде»,— тип әйтеп ҡалды.* М. Тажи.

**ҺИҘӘП** *и.* Кейем-һалымға таға торған ваҡ төймә. *Иҙеү һиҙәбен элеү. Һиҙәп баҫыу. Һиҙәп өҙөлөп төшөү. Һиҙәпте элеү.* ■ *Әй ҡабырсағы-*

*нан Оло Устикиндағы фабрика һиҙәп эшләп сығара.* М. Хисмәтов.

**ҺИЖРИ** [*ғәр.*] *с.* Һижрәттән (2 мәғ.) алып иҫәпләнгән йыл иҫәбенә ҡараған. *Һижри йыл иҫәбе.*

**ҺИЖРӘ** *и. ҡар.* **һижрәт** 2. *Башҡорт шәжәрәләрендә Ҡараҡөлөмбәттең китеү йылы 955 һижрә йәғни 1549—1550 йылдарға тура килеүе әйтелә.* Ә. Усманов.

**ҺИЖРӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Бер ерҙән икенсе ергә күсеш, күсенеш. *Исмәғил хан ахыр ғүмерендә халҡын йыйып, үҙенең васыятын әйтте. Үҙе: «Ҡәҙим атам йортона барам»,— тип, .. унда һижрәт кисерҙе.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**2.** Мосолмандарҙа йыл иҫәбе атамаһы (Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең Мәккәнән Мәҙинәгә күскән көнө 622 йыл 16 июлдән башланған). *Һижрәт буйынса иҫәпләү.* ■ *Атабыҙ хажи мулла Ялсығол донъянан үтте алтмыш биш йәшендә, рәжәп айында, жәүзәнең егерме алтынсы йәүмендә, тарихы һижрәттең 1200 йылында, ҡуй йылында.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

□ **Һижрәт итеү** (*йәки* **ҡылыу, кисереү**) күсеп китеү, сит ергә китеү. *Ҡотҡо буйынса һижрәт итеүселәр аттарын егеп, кире ауылдарына ҡуҙғалды.* Ғ. Хәйри.

**ҺИКЕ** *и.* **1.** Һауыт-һаба, аҙыҡ-түлек өсөн урындыҡ менән усаҡ араһына ҡуйылған тәпәшәк көплө өҫтәл. *Һике өҫтө. Һике эсе.* ■ *Ул Ғөлйөҙөм силәктәрен һикегә ултыртты ла, йүгереп килеп, Ғәззә инәһен ҡосаҡлап күреште.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *диал. ҡар.* **урындыҡ**[1] 1.

**ҺИКЕРЕНЕҮ** *ҡ.* **1.** Ҡабат-ҡабат һикереү, ырғанлау. *Һикеренеп йөрөү.*

**2.** *күсм.* Шашып ҡыланыу. *Ул Саҡай үтә һикеренде, кеше танымай башлағайны.* Б. Бикбай.

**ҺИКЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Һелтәнеп ебәреп кәүҙәне бер урындан икенсе урынға ташлау. *Атҡа һикереп менеү. Үргә һикереү. Үрҙән һикереү. Һыуға һикереү. Үрле-ҡырлы һикереү. Һикереп менеү. Һикереп килеп төшөү.* ■ *Хәйҙәр поездан тайшаныпюлдың икенсе яғына һикереп төштө.* М. Тажи. *Ҡотлобай һикереп тороп .. ишек асты.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Киҫкен-киҫкен аяҡты тибеп, алға хәрәкәт итеү. *Таштан-ташҡа һикереү.* ■ *Ҡуян ике-өс тапҡыр һикерҙе лә артына боролдо.* Я. Хамматов. / Ҡаҡлығып ҡапыл үргә атлығыу; киҫкен-киҫкен итеп, үрле-түбәнле хәрәкәт итеү. *Туп һикерә.* ■ *Тауға барһаң, тауҙар үкерә, ә диңгеҙҙә тулҡын һикерә.* М. Кәрим.

**3.** *күсм. һөйл.* Шашып ҡыланыу; ҡотороу. *[Сафа:] Әгәр бик һикерә башлаһа, хәбәр итегеҙ, теҙгенен тартырбыҙ.* Б. Бикбай.

♦ **Үрле-ҡырлы һикереү** нимәгәлер сыҙай алмай, борғаланып ҡыланыу. *Ошаҡ һатып, унан «түрә менән бергә ултырып ит ашаным», тип ярһырға, ҡупрайырға яратыусылар үрле-ҡырлы һикерәләр.* Т. Хәйбуллин. **Һикереп төшөү** эште, йомошто үтәргә ихлас, әҙер булыу. *Һикереп төшөп тороу.*

● *Айға һикерәм тип, арыҫландың биле биртенгән.* Мәҡәл. *Берәү туңып һикерә, берәү туйып һикерә.* Әйтем. *Тилене тиле тиһәң, тәртә буйы һикерә.* Әйтем.

**ҺИКЕРЕШ** *и.* **1.** Кәүҙәне киҫкен хәрәкәтләндереп бер урындан икенсе урынға күсереү. *Алға һикереш. Һикереш яһау. Парашюттан һикереш.*

**2.** *күсм.* Берәр эш, хеҙмәттә киҫкен үҫеш, алға китеш. *Мин уҡыуҙа ҙур һикереш яһаным. Мине бик тиҙ арала беренсе кластан икенсе, өсөнсө класҡа, унан дүртенсе класҡа күсерҙеләр.* З. Биишева.

**ҺИКЕРЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **һикереү.** *Һикерешеп урындан тороу. Һикерешеп уйнау.* ■ *Ғариф дилбегә ҡаҡты, һикерешеп арбаға менеп ултырған малайҙар .. рәхмәт әйтә белмәнеләр, бары баш ҡына һелкттеләр.* Б. Бикбай.

**ҺИКЕРТЕҮ** *ҡ.* **1.** *йөкм. ҡар.* **һикереү.** *Атҡа һикертеп мендереү. Ҡойма аша һикертеү.*

**2.** Бәреп, ҡағып юғарыға осортоу, күтәртеү. *Ҡыҙҙар туп һикертеп уйнай.*

**3.** Киҫкен хәрәкәтләндереп, күтәреп төшөрөү, өҫкә ҡыбырлатып алыу (яурын, ҡашты һ. б.). *Лётчик .. бер ни аңламаған кеше кеүек .. ҡулбаштарын һикертеп, аяғүрә баҫты.* Х. Мохтар. *Баҡса ҡыҙы сирень араһынан ҡаш һикертеп мине саҡырма!* Ғ. Хәйри.

**ҺИКЕРТЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **һикертеү.** *Ҡаш һикертешеү.*

**ҺИКЕРТМӘК** *и.* Шыуғанда һикертә торған урын. *Саңғы менән һикертмәктән һикереү. Һикертмәк яһау.*

**ҺИКЕРӘНЛӘК** *с.* Ырғанлап, һикерәнләп йөрөгән. *Һикерәнләк ҡыҙыҡай.*

**ҺИКЕРӘНЛӘҮ** *ҡ.* Тик тормайынса һикергеләү, һикергән һымаҡ хәрәкәтләнеү. *Һикерәнләп атлау. Һикерәнләп йөрөү.*

**ҺИКЕРӘНЛӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **һикерәнләү.** *Һикерәнләшеп уйнау.* ■ *Ҡыҙҙар ҡыуандылар: эһемкәс, ун биш тин ҡыя сапҡан, тип һикерәнләштеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**ҺИКҺӘН** *төп һ.* 80 һаны. *Һикһәндән унды алыу.* / Кем йәки нәмәнендер 80-гә тиң иҫәбе. *Һикһән кеше. Һикһән йыл. Һикһән һум.* ■ *Һикһән сакырым барҙыҡ беҙ ярты төндөң эсендә* (Бәйеттән).

**ҺИКҺӘНЕНСЕ** *рәт һ.* Урын тәртибе 80 менән билдәләнгән. *Һикһәненсе йәш. Һикһәненсе бүлмә. Һикһәненсе йылдарҙа.*

**ҺИКҺӘНЕШӘР** *бүл. һ.* Һәр бере һикһәнгә тиң. *Һикһәнешәр һум. Һикһәнешәр кеше.*

**ҺИКҺӘНЛЕК** *и. иҫк.* Боронғо егермә биш тинлек көмөш аҡса. *[Ҡорбан:] Алған аҡсаңдың, һаҡлап тотҡанда ла, өс-дүрт һикһәнлегә ауылға ҡайта.* А. Таһиров.

**ҺИКҺӘНЛӘП** *сама һ.* Һикһән смаһы, һикһәнгә яҡын. *Һикһәнләп кеше.*

**ҺИКӘЛ** *и. диал.* Һикәлтә.

**ҺИКӘЛТӘ** *и.* **1.** Текә ерҙәге киртләсләнеп торған урын. *Мейес һикәлтәһе. Яр һикәлтәһе. Ҡая һикәлтәһе.* ■ *Ул [Раян] .. ҡулын биреп, һикәлтәле ҡырлас таштарға менергә ярҙам итә.* М. Сәғитов. / Баҫҡыстың баҫа торған киртләсе. *Баҫҡыс һикәлтәләрен һанаған һымаҡ, йәйлап ҡына баҫҡыс буйлап юғарыға күтәрелдек.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**2.** Юл йәки ер өҫтөндәге тигеҙһеҙлек, урғыл ер;

урғылйын. *Һикәлтә юл.* ■ *Юлсы гәмһеҙ ҡарап бара, һикерткән һәр һикәлтәне йөҙөн һытып һанап бара.* М. Кәрим. *Шатыр-шотор бара тарткан арбам ҡыркмаһа ҡырк һикәлтә.* Н. Нәжми.

**ҺИКӘЛТӘК** *с.* Соҡор-саҡырлы, тигеҙ түгел, һикәлтәләре күп. *Һикәлтәк ер. Һикәлтәк юл.*

**ҺИКӘЛТӘЛЕ** *с.* Һикәлтәһе күп, тигеҙ түгел. *Һикәлтәле юл.*

**ҺИЛ**[1] *с.* **1.** Шау-шыуһыҙ, тауышһыҙ; тын. *Һил булыу. Һилгә ҡалыу.* ■ *Атыш баҫылып, урам һил булып ҡалды.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Ығы-зығыһыҙ, мәшәҡәтһеҙ, тыныс хәлдә булған. *Һил булыу.* ■ *Яу баҫылып, донъя һил булғас, Яйыҡбай батшаның .. һылыу ҡыҙын кәләш итеп алған* (Әкиәттән). // *Аскар яңғыҙ йөрәгенә бына ошондай эштәр менән һил тапты.* Н. Мусин.

**3.** Елһеҙ, буранһыҙ. *Һил көн.* ■ *Һилерәк урындарға шыйыҡ ҡына томан таралған.* Ә. Вәли. / Әкрен, тымыҡ. *Бына ҡайҙан һил ел алып үткән мәтрүш сәскәһенең хуш еҫен.* С. Кулибай.

♦ **Ил** (*йәки* **кеше**) **аяғы һил булыу** кеше йөрөүҙән туҡтап, тауыш баҫылыу. *[Беҙретдин:] Мин ҡараңғы төшөүен көтөбөрәк торам да, кеше аяғы һил булғас, кеше күҙе дөм булғас, Ҡорманай яғына ҡунаҡҡа һыпыртам.* К. Мәргән. **Һил аяҡта** кеше-фәлән йөрөмәгән тыныс ваҡытта.— *Юҡ, һил аяҡта ҡайтырға кәрәк. Һуңға ҡалһаң, кеше күҙенә эләгеүең бар.* Т. Хәйбуллин.

**ҺИЛ**[2] *и.* **1.** Тигеҙлектә ҡалҡыу булып, утрау һымаҡ торған ер; ҡалҡыулыҡ. *Һилгә менеү.*

**2.** *диал.* Бәләкәй утрау.

● *Тиңһеҙҙе тиңгә тартһаң, арты һилгә тарта.* Мәҡәл.

**ҺИЛА** *и. ҡар.* **Һула.**

**ҺИЛАЛ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Яңы тыуған ураҡ һымаҡ булып торған ай. *Эй һилал, һин бушҡа эленеп торғанса, ҡулымда ҡон алыр бер ҡылыс булһаңсы.* Р. Ғарипов.

**ҺИЛДӘҮ** *и. диал.* Тау биләне.

**ҺИЛЛЕК** *и.* **1.** Тынлыҡ, тыныслыҡ. *Һиллек баҫты бар донъяны, бар тәбиғәт сумды ялға.* А. Игебаев.

**2.** Һуғыш, булмаған хәл; тыныслыҡ. *Иң ҡиммәтлеһе — донъяла һиллек булһын. Бар теләк шул.* Б. Вәлит.

**ҺИЛЛӘНЕҮ** *к.* Һилгә[1] әйләнеү, һил булыу. *Яңғыҙ ҡайын! Ойоп торор сакмы! Ниңә тындың? Нигә һилләндең?* Ш. Бикҡол.

**ҺИЛЛӘҮЕК** *и. диал.* Ҡалҡыулыҡ.

**ҺИМ** *и. диал.* Шим, ҡур. *Алмаңды беҙ йыйып, ашап алғас, ҡалыр ине эскә һим булып.* М. Уразаев.

**ҺИМЕҘ** *с.* **1.** Тулы, йоморо тәнле, йыуан, (күберәк кешегә ҡарата). *Һимеҙ кеше. Һимеҙ булыу.* ■ *Йыуан ғына балтырлы һимеҙ бер ҡыҙ уртаға сыҡты.* Т. Йәнәби.

**2.** Майы күп, майлы (иткә, ашҡа һ. б. ҡарата). *Һимеҙ ит. Һимеҙ һурпа.* ■ *Ҡыҙарышып бешкән һимеҙ ҡаҙҙар теҙелешеп яталар ине.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Туй һимеҙ** *ҡар.* **туй.**

**ҺИМЕРЕҮ** *к.* **1.** Тәнгә май йыйып, йыуанға, һимеҙгә әйләнеү; һимеҙ булыу. *Ныҡ һимереү зарарлы, һаулыҡты ҡаҡшата.* В. Ғүмәров. **Елгә һимереү** күп ашамайынса ла тиҙ генә сәбәпһеҙ һимереп китеү.

**2.** *күсм.* Аҡса, мал йыйып, байығыу. *Атлы ҡаҙаҡтар артта крәҫтиән талап, һимереп яталар.* Д. Юлтый.

● *Ҡайғыһыҙ ҡара һыуға һимергән.* Әйтем. *Үләнле ерҙә мал һимерер, даулы ерҙә түрә һимерер, үлемле ерҙә мулла һимерер.* Мәҡәл.

**ҺИМЕРТЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **һимертеү.** *Һимертелгән мал.*

**ҺИМЕРТЕҮ** *к.* **1.** Һимеҙгә әйләндереү, һимеҙ итеү. *Ашатып һимертеү.*

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **һимереү** 1. *Икмәкте күп ашау һимертә.*

**3.** Һуғымға әҙерләп ашатыу. *Мал һимертеү. Һимертеп һуйыу.* ■ *Эткол бай улының туйына .. ике тыу бейә, бер тыуса һимертте.* Ғ. Дәүләтшин. / *күсм.* Эшләмәгән кешене ашатыу. *[Гөлбәзирә:] Тышҡа сыҡһам, ниңә улыңды һимертеп ятҡыраһың, эшкә ҡушмайһың, тип, күҙҙе астырмайҙар.* Р. Ниғмәти.

**4.** *күсм.* Анһат аҡса, мал менән байытыу, аҙҙырыу.

♦ **Йоҡо һимертеү** күп йоҡлау.

● *Нәпсене һимертһәң, үҙеңә бәлә өҫтәр.* Мәҡәл.

**ҺИМЕҮ** *к.* **1.** Шиңеү, кәмеү. *Шешек һимә. Ҡар һимә.* ■ *Йылъяҙмаға тағы бер ҡараһам, бере йәнгә һеңгән аҫыл йырҙай, бере шиңгән, һимгән яралай.* С. Кулибай.

**2.** Үҙләшеп, һеңеү (ашаған ашҡа ҡарата). *Ашағаның һимә төшһөн.* М. Тажи.

**ҺИММӘТ** [*гәр.*] *и.* **1.** Көслө ынтылыш, ялҡынлы дәрт; тырышлыҡ. *Дәрткә — ҡанат, ашҡа — тат, һиммәт биргән Уралтау.* А. Игебаев.

**2.** Намыҫ, дан. *Сәсәндәр төрлө йыйындарҙа, байрамдарҙа үҙ ырыуының һиммәтен һаҡлар, ил ағаларының эшен яҡлар булғандар.* Ә. Харисов.

□ **Һиммәт итеү** тырышыу, тырышлыҡ күрһәтеү. *Ир кеше һиммәт итер төн дә, көн дә, ирлеге беленер ҡарап һиммәтенә.* М. Ғафури.

● *Ҡош ҡанат менән, ир һиммәт менән оса.* Әйтем.

**ҺИММӘТЛЕ** *с.* **1.** Дәртле, тырыш. *Һиммәтле егет. Һиммәтле булыу.*

**2.** Күренекле, абруйлы. *[Хикмәтулла:] Үҙең былай һиммәтле генә күренәһең, ә үҙең әллә ниндәй әҙәм эйәртеп йөрөйһөң.* В. Нафиков.

**ҺИН** (һинең, һине, һиңә, һиндә, һинән) *зат а.* Икенсе зат алмашының берлек формаһы (бер кешегә мөрәжәғәт иткәндә ҡулланыла). *[Шәхми:] — Ҡустым Ғәләү, бына бөгөн беҙгә ҡунаҡ килә. Һин дә беҙҙең менән бергә һыйланырһың.* Т. Йәнәби. *Арып ҡайтырһың һин [Сәйҙел], эш бөткәс, шунда һинең килеүенде көтөп, балаң ҡаршы алыр ишектән.* Ғ. Сәләм. / Тантаналы телмәрҙә, риторик һөйләмдәрҙә ҡулланыла. *Эй, һин гәзиз илем.* ■ *Күккә ашкан Уралым! Һине маҡтай йырҙарым, һине данлай йырҙарым.* Салауат Юлаев.

♦ **Һин дә мин** бик яҡшы, бик һәйбәт. *Беҙ Хәлилич менән һин дә мин татыу ғына йәшәп килә[беҙ].* С. Кулибай. **Һин дә мин, Мөхәмәтәмин шаяр.** бөтәбеҙ ҙә, барыбыҙ бергә. **Һин күр ҙә мин күр** ниндәйҙер бер эш, хәлде кешеләр белеп ҡуй-

маһын тип шикләнгәндә әйтелә. *Зәйнәп карсыҡ тиҙ генә ишекте асып һыҙҙы. Һин күр ҙә мин күр. Урамға сыҡкас та ..абына-абына йүгерә.* Ш. Шәһәр.

● *Һин дә мулла, мин дә мулла, атҡа бесән кем һала?* Әйтем.

**ҺИНД** *и.* Һиндостандың төп халҡын тәшкил иткән милләттәрҙең береһе һәм шул милләттең бер кешеһе. *Һинд халҡы. Һинд ҡатыны. Һинд телдәре.*

**ҺИНЕКЕ** *эйл. а.* Һиңә ҡараған, һиңә хас булған. *Был китап һинеке. Йорт һинеке була.* ■ *[Капитан:] — Был хат һинекеме? — тине, өҫтәлдәге хатҡа ҡурһәтте.* Д. Юлтый.

**ҺИНЕКЕ-МИНЕКЕ** *эйл. а.* Нимәнелер бүлеп, айырып ҡарауҙы аңлата. *Һинеке-минеке булырға тейеш түгел.* ■ *Хәҙер һинеке-минеке юҡ, коммуна булып йәшәйбеҙ бит. Кеше айырып ҡарау булмаһын.* М. Тажи. *[Хөрмәт:] Мәктәп менән ғаилә араһында һинеке-минеке юҡ. Булырға тейеш тә түгел. Дөйөм бурыс ҡына бар.* Я. Вәлиев.

● *«Һинеке-минеке» — күңел тарлығы, «ары ят, бире ят» — түшәк тарлығы.* Мәҡәл.

**ҺИНЕҢСӘ** *р.* Һин әйткәнсә, һин уйлағанса, һинең фекереңбуйынса. *Һинеңсә булыр. Һинеңсә түгел.* ■ *Ҡадир шул күлдәкте үҙ иңенә һалып самалап ҡараны. — Минеңсә, ошо тамам булыр,— тине ул, Ғәләүгә ҡарап,— һинеңсә нисек?* Б. Бикбай. *Һәр отоуҙың була оттороуы, һәр бер теләк йөрөмәй һинеңсә.* Ғ. Хәйри.

**ҺИНТЕКЛӘҮ** *к. диал.* Миңрәүләнеү. *Аҡназар бай һиңмайланған һымаҡ, йөрөп ятты башы һинтекләп.* М. Тажи.

**ҺИНЕҮ** *к. диал.* Һимеү.

**ҺИҢКЕЛДӘК** *с.* Һиңкелдәп торған. *Һиңкелдәк арба.*

**ҺИҢКЕЛДӘТЕҮ** *к.* Үрле-түбәнле бәүелтеү; һелкетеү. *Һиңкелдәтә баҫыу.* ■ *[Ҡаһым түрә:] Башҡынайым минең бик ауырта, һиңкелдәтмәң минең көймәмде* (Халыҡ йырынан).

**ҺИҢКЕЛДӘҮ** *к.* Үрле-түбәнле ҡағылып йәки бәүелеп һелкенеү. *Һиңкелдәп көлөү.*

**ҺИҢКЕТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **һиңкеү**. *Аллаяр йоҡа иҙән такталарын һындыра яҙып, һиңкетә баҫып, ҡаҙан янына барҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

◆ Дыу **һиңкетеү** геү килтереү, гөрләтеү. *Ҡыҙ менән егет дыу һиңкетеп, донъя күтөп һаман да тора, ти.* (Әкиәттән). Ер **һиңкетеү** 1) ныҡ итеп һелкетеү. *[Барсын һармаҡлай:] — Атай, атай, алпар килә. Ултырҙыниһә, уй һиңкетә, йөрөниһә, ер һиңкетә.* «Алпамыша»; 2) *күсм.* көслө дәрт, күтәренке рух менән нимәлер эшләү. *Ер һиңкетеп бейеү.* ■ *Һуңғы бер нисә көндә Аллаяр бөтөнләй бөтөрөндө .. Әле генә ер һиңкетеп, хужалыҡ хәстәрлеге менән .. йөрөгән кеше бөтөнләй һүнеп ҡалды.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҺИҢКЕҮ** *к.* Ҡағылып, үрле-түбәнле ҡаҡлығып һелкенеү. *Арба һиңкей.* ■ *Яр буйынан китеп бара инек ер һиңкене ниҙер шартлауҙан.* М. Тажи.

**ҺИҢМАЙ** *с.* Әйткәнде тиҙ генә аңлай алмаған, тиҙ онотоп барған; миңрәү, аңра. *Һиңмай булыу. Һиңмайға әйләнеү.* ■ *[Сәлим:] Бер ни ҙә һорашманыңмы ни? [Венера:] Һорашманым. [Сәлим:] — Ах, һин, һиңмай!* Н. Иҙелбай.

**ҺИҢМАЙЛАНЫУ** *к.* Һиңмайға әйләнеү, аңра, һиңмай булыу. *Бара торғас, ҡапыл туҡтап тороп, башты баҫып, һиңмайланып ниҙер уйланым.* Б. Вәлит.

**ҺИҢРӘҮ** *с. диал.* 1. Тыңҡыш, һыңғырлаҡ. *Һиңрәү кеше. Һиңрәү булыу.*

2. Аңра, миңрәү. *Һиңрәү итеү.*

**ҺИП** *и.* Өҫтәлгән өлөш; өҫтәмә. *Һип өсөн бүрәнә әҙерләү.* **Һип** ҡуйыу бүрәнең серегән бүрәнәһен алып, яңыһын ҡуйыу; өҫтәп ҡуйыу; һипләү.

**ҺИП-** *киҫ.* **һи**- ижеге менән башланған сифат һәм рәүешкә ҡушылып, уның мәғәнәһен көсәйтә. *Һип-һирәк. Һип-һимеҙ.*

**ҺИПКЕЛ** *и.* Тәнгә, бигерәк тә биткә яҙ көнө сыға торған ваҡ-ваҡ көрән тап; *һипкел сығыу.* ■ *Ерән кешеләрҙең күпселеге кеүек, Васяның бөтә тәнен һипкел баҫҡан.* Х. Мохтар.

**ҺИПКЕЛЛЕ** *с.* Һипкел менән ҡапланған, һипкеле бар. *Һипкелле ҡыҙ.* ■ *Дилбәрҙең ҡаштары ла көнгә көйгән, танауы ла һипкелле.* М. Кәрим.

**ҺИПКЕЛЛӘНЕҮ** *к.* Һипкеллегә әйләнеү.

**ҺИПКЕН** *и. диал. ҡар.* **ипкен**[1]. *Һипкелле ҡыҙ! Һипкелдәрен биттәремә һипкен бәрҙе.* Р. Бикбаев.

**ҺИПЛӘНЕҮ** *к. төш. ҡар.* **һипләү**. *Һипләнгән өй.*

**ҺИПЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **һипләү**. *Өйҙө һипләтеү.*

**ҺИПЛӘҮ** *к.* 1. Бура йәки башҡа берәй ҡоролманың серегән, иҫкергән ерен яңыртып йүнәтеү. *Өй һипләү.* ■ *Ата донъяһы ла иҫкергән, өйҙө һипләп ҡалырға, кәртә-ҡураны йүнәтергә кәрәк.* Н. Мусин. *[Ғариф:] Һалабаш күле янындағы соҡорҙоң күперен һипләп һалыу кәрәк.* Ж. Кейекбаев.

2. *күсм.* Рәткә, тәртипкә килтереү; йүнәтеү, ипләү. *Көлтәләрҙе һипләп ҙуратҡа һалғас, Ғатаулла, күңеле ҡанып, ҡыуышҡа ҡайтты.* Й. Солтанов.

● *Иҫкене ипләп кей, туҙғанды һипләп кей.* Мәҡәл.

**ҺИПЛӘШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **һипләү**. *Өй һипләшеү.*

**ҺИПМӘ** *с.* Сәсрәтеп һибеп яуған. *Һипмә ямғыр.* ■ *Дөм ҡараңғы, һипмә ямғырлы төн .. постарҙы беҙ барлап ҡайта инек.* С. Кулибай.

**ҺИПТЕРГЕС** *и.* Ниҙелер һиптереү өсөн хеҙмәт иткән ҡорамал. *Дарыу һиптергес. Һыу һиптергес. Һиптергес менән һыу һибеү.*

**ҺИПТЕРЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **һиптереү**.

**ҺИПТЕРЕҮ** *к.* 1. *йөкм. ҡар.* **һибеү** 1, 2. *Баҡсаға һыу һиптереү. Юлға ҡом һиптереү.*

2. *күсм.* Берәй төрлө ҡоралдан (мылтыҡ, пулемёт һ. б.) көслө атыу; ут яуҙырыу. *Бер лётчик беҙгә махсус рәүештә пулемёттан һиптерҙе.* А. Карнай.

3. *күсм.* Геү килтереү; гөрләтеү, типтереү. *Һинең күҙең майлы [егет], моғайын, берәр бейек үксә менән һиптерәһеңдер әле.* С. Кулибай.

4. *күсм.* Нимә менәндер һуҡҡылап туҡмау. *Өс егет өс яҡтан шүрәлегә сыбыҡтар менән һиптерә башланы, шүрәленең аҡырыуына аҫтындағы бейә үрә тора башланы, ти* (Әкиәттән).

**ҺИРПЕЛДЕРЕҮ** *к. ҡар.* **һирпелеү** 2, 3. *Өҫтәл янында аҡ күлдәгенең киң итәген һирпелдереп,*

*бер ҡыҙ ултыра.* Ф. Иҫәнғолов. *Талдың ботағын һирпелдереп ебәреүем булды, шунда уҡ һандуғас һайрауҙан туҡтаны һәм пырр итеп осоп китте.* Ф. Бикбов.

**ҺИРПЕЛЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **һирпеү** 1, 2. *Һирпелгән һыу.*

**2.** Һелтәгән кеүек, ҡапыл сайпылыу. *Ташҡын шәбәйгәс, һыу күпер өҫтөнә һирпелеп ята.* М. Тажи.

**3.** Төрлө яҡҡа ҡапыл сәселеү, таралыу (ҡар, туҙан һ. б. ҡарата). *Яр буйына йыйылған ваҡ сабаҡтар һыу өҫтөн зымбырлатып, тирә-яҡҡа һирпелде.* Н. Мусин. / *күсм.* Бөркөлөү, һибелеү (яҡтылыҡ, нур һ. б. ҡарата). *Тәҙрәләрҙән ятаҡханаға иртәнге алһыу нурҙар һирпелде.* С. Агиш. *Һәр бер йөҙҙән шатлыҡ һирпелә.* Р. Ниғмәти.

♦ **Һирпелеп ҡарау** ҡапыл ғына ҡарап алыу; ҡараш ташлау. *Бәғиҙә һирпелеп кенә ҡараны ла, һарайға инде лә китте.* Ш. Янбаев.

**ҺИРПЕҮ** *ҡ.* **1.** Ҡапыл һелтәп түгеү, һибеү (шыйыҡ нәмәне). *Һыу һирпеү. Түтәлгә һыу һирпеү. Урамға һыу һирпеп туҙанын баҫыу.*

**2.** Ҡапыл һелтәп сәсеү, һибеү (ваҡ, бөртөклө нәмәне). *Мин селтәр һоҫҡо менән мәкенән боҙ вағын һирпеп түгергә керештем.* Ф. Иҫәнғолов. *Ҡомһоҙ амбразура иртә тандан пуля һирпә урман ситенә.* Я. Ҡолмой.

**3.** Ҡапыл һелтәп һелкетеп ҡайырыу. *Тимерхан .. мундир салғыйҙарын артҡа һирпә биреп, ҡулдарын салбар кеҫәләренә тыҡты ла атаһының ҡаршыһына килеп баҫты.* Н. Мусин. *Ул [Мазһар] башын сайҡап маңлайына төшкән көлтә һымаҡ ҡуйы, ҡарағусҡыл сәстәрен артҡа һирпте.* Ш. Насыров. / Ҡапыл һелтәп күтәреү. *Ҡарт бейек ҡарағайға һирпеп менеп китте* (Әкиәттән).

**4.** Ҡапыл һелтәп һоҫоп алыу, өҫтөнән һоҫоу. *Таш баҫмала ҡыҙ бала һирпеп-һирпеп һыу ала.* Ҡ. Даян.

**5.** *күсм.* Бөркөү, һибеү, таратыу (яҡтылыҡ, нурҙы һ. б.). *Нур һирпеү.* ■ *Һыу өҫтөнә көмөш саҡҡылар һирпеп, бер өҙлөкһөҙ балыҡтар ҡарпый.* З. Биишева.

♦ **Күҙ һирпеү** ҡапыл ҡарап алыу; ҡараш ташлау. *Ҡаш аҫтынан ғына күҙ һирпеп алдым.* Р. Солтангәрәев. *Ҡыҙ уның [Мораҙымдың] йөҙөнә башҡа ҡыя алмағандай ғына күҙ һирпене, аҙаҡ егеттең утлы, үткер күҙҙәренә туп-тура ҡараны.* Ғ. Әмири.

**ҺИРПЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **һирпеү** 1, 2. *Аҡҡоштар шатлыҡ менән ҡабындылар, һыу һирпешеп бер-беренә ҡағындылар.* Ш. Бабич.

**ҺИРПМӘ** *и. диал. ҡар.* **сиртмә** 3. *Һирпмә ҡуйыу.*

**ҺИРТМӘ** *и.* **1.** Тартҡанда һуҙыла һәм кире ҡайта торған һығылмалы нәмә; сиртмә, пружина. *Сәңгелдәккә һиртмә ҡуйыу. Сәңгеләк һиртмәһе.* ■ *Кәмәр ҡулындағы баланы бишеккә һалып, һиртмә шығырлауына .. йомшаҡ тауыш менән ҡушылды.* Ғ. Ильяс.

**2.** Бер осон ныҡытып, икенсе осо тирбәлеп торорлоҡ булған, балаларға әүһәләк итеп бәүелеү өсөн яһалған ағас; сиртмә, ағас әүһәләк. *Муйыл һиртмә. Тал һиртмә. Һиртмә яһау. Һиртмәлә бәүелеү.*

**3.** Йәш ағасты бөгөп, тартҡас та ысҡынырлыҡ итеп эләктереп, осона бауҙан тоҙаҡ яһап ҡуйылған һунар ҡоралы, сиртмә. *Һиртмә ҡороу. Һиртмә ҡороп һуйыр тотоу.* ■ *Бер һиртмәбеҙгә һуйыр эләккән, ысҡынмаҡсы булып әй талпына.* Н. Мусин.

**4.** Ҡоҙоҡтоң һыу күтәртә торған оҙон һайғауы; сиртмә. *Ҡоҙоҡ һиртмәһе.* ■ *Буралы ҡойо бар беҙҙең, һиртмәһе лә бар уның.* Х. Ғиләжев. *Ҡоҙоҡ һиртмәһе шығырлап, бер төшә, бер ҡалҡына.* Ғ. Байбурин.

**ҺИРТМӘК** *и.* Тоҡанлы бау. *Һиртмәк һалыу.* ■ *Ташты бәйләп һыуға ырғытырға һиртмәк һалған кеүек муйынға. Һөргөн уға ауыр каза булды.* М. Хәй.

**ҺИРТМӘЛЕ** *с.* Һиртмәһе (1, 4 мәғ.) булған, һиртмә ҡуйылған. *Һиртмәле ҡойо. Һиртмәле сәңгелдәк.* ■ *Баштары никелләнгән һиртмәле карауаттар, ап-аҡ түшәк ябыуҙары .. һоҡланғыс матурҙар.* Ә. Байрамов.

**ҺИРӘГӘЙЕҮ** *ҡ.* **1.** Һирәккә (1 мәғ.) әйләнеү, һирәк булыу. *Сәсе һирәгәйеп бөткән.* ■ *Хәҙер урман да йылдан-йылға һирәгәйә, йәнлектәр, ҡоштар ҙа кәмей бара.* М. Тажи.

**2.** Ниндәйҙер бер күренеш, хәл һ. б. кәмеү, әҙәйеү. *Аяҙ көндәр һирәгәйҙе. Осрашыу һирәгәйҙе. Ҡунаҡҡа йөрөү һирәгәйҙе. Төндә трамвай һирәгәйә.* ■ *«Ура» тауыштары тынды. .. Пулемёт тауыштары ҡапыл туҡтанылар. Бомбалар ҙа һирәгәйҙеләр.* Д. Юлтый. / Аҙ ҡалыу, һан яғынан кәмеү. *Ауылдарҙа ҡарттар һирәгәйә. Боронғоса уҡый белеүселәр һирәгәйә бара.* ■ *Ир-ат һирәгәйҙе. Донъя көтөү бисә-сәсә, ҡарт-ҡоро, йыйын сирләшкә ҡулына ҡала бара.* Д. Исламов. *Һуңғы йылдарҙа ҡоштар бында һирәгәйҙе, Үткенсе ҡоштар ҙа туҡтамай башланы.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 9 ғинуар.

**ҺИРӘГӘЙТЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **һирәгәйтеү.** *Һирәгәйтелгән урман.*

**ҺИРӘГӘЙТЕҮ** *ҡ.* Һирәккә (1 мәғ.) әйләндереү, һирәк итеү; һирәкләү. *Йәшелсәне утап һирәгәйтеү.*

**ҺИРӘГӘЙТКЕС** *и. һөйл.* Йәшелсәне һирәгәйтә торған машина.

**ҺИРӘК** *с.* **1.** Бер-береһенән алыҫ, аралыҡлы урынлашҡан; ҡуйы түгел. *Һирәк ағас. Һирәк сәс. Һирәк тешле бысҡы. Һирәк булыу.* ■ *Һирәк кенә ерән һаҡаллы .. ҡарт — Әссәләмәғәләйкум, йәмәғәт,— тип сәләм бирҙе.* М. Тажи. *Һирәк ботаҡлы ҡарағайҙар төҙ һәм юғары күтәрелеп үҫкәндәр.* Д. Юлтый. / Беше, ныҡ, тығыҙ түгел (туҡыма тураһында). *Һирәк селтәр.* ■ *Һирәк кенә һирәк әй аҡ ситса күренеп тора ап-аҡ тәнкәйем* (Сеңләүҙән).

**2.** Бик әҙ осрай торған, әҙ була торған. *Һирәк аҙыҡ. Һирәк моң. Һирәк хәл. Һирәк эш. Һирәк булыу.* ■ *Ике матурҙың бер түкәндән тап килеүе ул һирәк эш.* Т. Хәйбуллин. *Бик күп йөрөп илдә күпте күрҙем, һиндәй һылыу һирәк донъяла* (Халыҡ йырынан). // *Сикһеҙ байлыҡ, иркәлек, рәхәт тормош бик һирәктәргә эләгә ине.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Ғәҙәттәгенән оҙаҡ, күп ваҡыт үткәс ҡабатлана, була торған; йыш, һәр саҡ түгел. *Һирәк ҡунаҡ.* // *Һирәк осрау. Хат һирәк килә.* ■ *Тел-*

*дән батырҙар күп тә бит ул. Йөрәктән батырҙар һирәгерәк осрайҙар шул.* З. Биишева. *Беҙ фронтка барып еткәндә инде ҡыҙыу һуғыштар туҡталғайны. Туп тауыштары бик алыҫта һирәк ишетеләләр.* Т. Йәнәби.

● *Иҫәп кәрәк, уй кәрәк, уйлап эшләнгән һирәк.* Әйтем. *Һирәк тешле кешенең ауыҙында һүҙ тормай.* Мәҡәл.

**ҺИРӘКЛӘНЕҮ** *ҡ. ҡар.* **һирәгәйеү.** *Сәсе һирәкләнгән.* ■ *Һуғыш күптән бөттө, ләкин һаман һирәкләнә беҙҙең аралар.* Ғ. Рамазанов. *Ағастары ҡалған бик ваҡ, улар ҙа бик һирәкләнгән.* М. Өмөтбаев.

**ҺИРӘКЛӘП** *р.* Әллә ниҙә бер; һирәк итеп. *Һирәкләп килеү. Һирәкләп осрашыу.* ■ *Еләндең салғыйҙарына, бөйөрҙәренә, билдәренә һирәкләп кенә ҡаҙаған унар, ун бишәр тинлек көмөш тәңкәләр генә .. ялтырап торалар.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҺИРӘКЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **һирәкләү.** *Сөгөлдөрҙө һирәкләтеү.*

**ҺИРӘКЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Һирәккә (1 мәғ.) әйләндереү, һирәк итеү.

**2.** Ҡайҙалыр барып йөрөүҙе кәметеү, һирәккә ҡалдырыу. *Һин беҙгә быйыл һирәкләнең.*

**ҺИРӘК-МИРӘК** *р.* Бик һирәк; һирәк-һаяҡ. *Апрелдең тәүге яртыларында ер өҫтөндә һирәк-мирәк йәшел үҫентеләр күренә башлай.* Н. Мусин. *Урамдан обоздар, һирәк-мирәк йөк автомобилдәре үтәләр.* Д. Юлтый. *Урам тын. Тоноҡ ай аҡтыһында һирәк-мирәк йөрөгән полицейский, стражниктарҙың шәүләләре күренә.* М. Ғафури.

**ҺИРӘК-ҺАРАҠ** *р. ҡар.* **һирәк-һаяҡ.** *Ҡыҙ нигәлер шат күеҡ күренмәй. Һирәк-һарыҡ ауыр ғына һулап ҡуя.* Ғ. Хәйри.

**ҺИРӘК-ҺАЯҠ** *р.* Бик һирәк; һирәк-мирәк. *Һирәк-һаяҡ булыу.* ■ *Урамдан һирәк-һаяҡ кешеләр ҡайҙалыр ашығып үтә.* Б. Бикбай. *Ағас баштарынан һирәк-һаяҡ ҡош тауышы ишетелә.* Б. Хәсән.

**ҺИРӘК-ҺАЯҠЛАП** *р.* Әллә ниҙә бер, бик һирәк. *Бер аҙҙан Платов һирәк-һаяҡлап ауыл араһында күренгеләй башланы.* Д. Исламов.

**ҺИРӘМЕК** *с. диал. ҡар.* **һирәк** 1. *Һирәмек урман. Һирәмек булыу.*

**ҺИРӘҮ** *ҡ. диал.* Һирәгәйеү. *Йыуан тирәк күп ине, хәҙер һирәне.*

**ҺИРӘҮӘН** *с. диал. ҡар.* **таидыр**[1]. *Һирәүән генә янған ут.*

**ҺИС** [*фарс.*] *киҫ.* **1.** Юҡлыҡ мәғәнәһенә ҡаты ҡәтғилек бирә; бөтөнләй, бер ҙә. *Һис гәйепһеҙ.* ■ *Йырлай башланылар Зәйнәптәргә һис таныш булмаған бер көйгә.* Ғ. Сәләм. *Һис ҡайғырма, шатлан әүәлгесә, бәхе еңер әле, иншалла.* Ш. Бабич.

**2.** Төрлө һүҙҙәр менән килеп ҡәтғи, тулы инҡарҙы белдергән һүҙ бәйләнеше яһай. *Һис бер. Һис ваҡыт. Һис бер кем. Һис касан. Һис ҡайҙа. Һис бер нәмә.* ■ *Мәскәү ул иң ҙур ҡалаһы беҙ йәшәгән доъяның. Һис кем белмәй башҡа берәр шундай ҡала булғанын.* Р. Ниғмәти.

♦ **Һис булмаһа** (*йәки* **юғында**) бер ҙә булмағанда; исмаһам. *Һис булмаһа, бер тоҡом ҡалдырам тип, [Ҡараҡөлөмбәт] бер ҡыҙҙы алды үҙе менән бергә.* „Бабсаҡ менән Күсәк". **Һис һүҙһеҙ** икеләнеп тормайынса, ҡаршылыҡһыҙ. **Һис шикһеҙ** бер ҙә икеләнеп тормайынса, шикләнмәйсә. *Яңылыҡ булғас, һис шикһеҙ, уны ҡабул итергә кәрәк.* С. Агиш.

● *Барс йылы барын сәс, һис булмаһа, тары сәс.* Мәҡәл.

**ҺИҪКӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Һиҫкәнергә сәбәп биреү. *Ташлы юлда сыҡылдап ташҡа бәрелгән дага тауыштары, тоноҡ ҡына ишетелгән шпор тауыштары мине һиҫкәндерҙе.* Б. Ишемғол.

**ҺИҪКӘНЕҮ** *ҡ.* Ниндәйҙер сәбәптән ҡапыл ҡурҡҡан һымаҡ итеп ҡалтыранып ҡуйыу. *Һиҫкәнеп китеү.* ■ *Көтмәгәндә һиҫкәнде бөтә халыҡ Ер тетрәүҙән ҡурҡышып, таңға ҡалып.* „Бабсаҡ менән Күсәк".

**ҺИТӘ** *и.* Бал ҡорттарының сәскә һеркәһенән йыйып, кәрәҙгә тултырып әҙерләгән аҙығы; манса. *Ҡорт елеме, ағыуы, инә һөтө, һитә һәм башҡа продукттар аҙыҡмы, дарыумы, шуларҙы асыҡларға кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 10 июнь.

**ҺИТӘЛЕ** *с.* Һитәһе булған. *Һитәле рам.* ■ *Ояла һәр ваҡыт кәмендә һитәле ике рам булһа, ҡорттар яҡшы үрсей, ауырыуҙарға, һауа шарттарының үҙгәреүенә бирешеп бармай.* И. Шафиков. **һитәле бал** һитә ҡушылған бал. *Күп кенә умарталыҡтарҙа .. ҡышҡылыҡҡа насар, һитәле бал ҡалдырыла.* Н. Мусин.

**ҺИТӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Ҡарайып боҙолоу (балауыҙға ҡарата).

**ҺОҒАЛАН** *с.* Ҙур-ҙур һоғоноп, ҡабаланып ашаусан (кешегә ҡарата). *[Емеш — Хәсәнгә:] Бәләкәс сактан өйрәк кеүек һоғалан булдың бит һин.* З. Биишева.

**ҺОҒАЛАНЫУ** *ҡ.* Ҡабаланып, ҙур-ҙур һоғоноу. *Һоғаланып ашау.* ■ *Бай табаҡты алдына алып, һоғалана-һоғалана ашарға тотона* (Әкиәттән).

**ҺОҒОНДОРОУ** *ҡ.* **1.** *этн.* Ҡунаҡ итеү йолаһы буйынса ҡул менән алып, итте кеше ауыҙына ҡаптырыу. *Ит һоғондороу. Ҡаҙы һоғондороу. Май һоғондороу.* ■ *Һоғондороусылар табаҡтағы ит, һалмаларҙы баш бармаҡ менән йыйып, һулаҡай ҡул менән ус эсенә төйөп, төйөнсөкләп һоғондороп ебәрһәләр, ауыҙ эсен тултырып барып, бәләкәй телгә текәлә лә, бер аҙ ваҡыт ашты сәйнәй алмай тораһың.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *күсм. һөйл.* Ҡаты бер һүҙ әйтеү йәки ауыр бер яза биреү. *[Яҫкәр:] Тура биш тәүлек нәрәт һоғондора яҙҙы әле.* Б. Бикбай.

**ҺОҒОНДОРОШОУ** *ҡ. урт. ҡар.* **һоғондороу.** *Ҡунаҡта ит һоғондорошоу. Һоғондорошоп ашау.* ■ *Ғәмилә һалма килтерҙе. Ҡунаҡтар һалманы ҡул менән һоҫа башланылар, ус тултырып ит һоғондороштолар.* Б. Бикбай.

**ҺОҒОНОУ** *ҡ.* Ҡул менән биргәнде ауыҙға алыу. *Майлы ҡаҙыны һогоноу.* ■ *Рәхимә ҡаҙы-ялдарҙы турап бөтөп, бер төпсөк ҡаҙыға бер ҡыҫҡым ит ҡушып, Мәғфүрәгә бирҙе: „Мәле, килен, һоғон әле. Үҙең былтыр һауған бейәнең итен ауыҙ ит..",— тине.* Һ. Дәүләтшина./ Ҙур итеп ауыҙға ҡабыу. *Ертыңлар батыр ҡаҙандан бер оло киҫәк ит алып биргән. Ҡарт уны*

*бер генә һогонған да: „Тағы бир!“ — тигән* (Әкиәттән).

**ҺОҘҒАҠ** *и. диал.* Һоҫко.

**ҺОҠ** *с.* **1.** Күңел тартҡыс, һоҡланғыс. *Туҡ буйкайҙары ай һоҡ тиҙәр, Туҡ буйы күк ерҙәр юҡ тиҙәр* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ҡомһоҙ, мәскәй. *Һоҡ булыу.*

♦ **Ҡулы һоҡ** *шул уҡ* **ҡулы оҙон** (*ҡар* **ҡул**[1]). **Һоҡ тейеү** *шул уҡ* **күҙ тейеү** (*ҡар.* **күҙ**). *Кеше һого яман зәһәрле, хатта аҫау айғырҙарҙы үлтерә, һомғол-ағасты ҡорота, тип борондан әйтә киләләр.* Ш. Янбаев.

● *Һайыҫҡан һаҡлығынан үлмәй, һоҡлоғонан үлә.* Әйтем. *Һоҡ һимермәҫ, бур байымаҫ.* Әйтем.

**ҺОҠЛАНҒЫС** *с.* Һоҡланыу хисе уятырлыҡ; бик яҡшы, матур; һоҡландырғыс. *Һоҡланғыс тәбиғәт. Һоҡланғыс кеше.* ■ *Мағаш исемле бик матур бер тау бар. Уның итәгенән генә Еҙем тип аталған һоҡланғыс йылға аға.* Ш. Насыров.

**ҺОҠЛАНДЫРҒЫС** *с. ҡар.* **һоҡланғыс.**

**ҺОҠЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Һоҡланыу тойғоһо уятыу. *Үҙемдең дә хәҙер бала өсәү инде, һоҡландырып үҫеп киләләр.* Ғ. Сәләм. *Ул йондоҙҙар янһын шунда, һоҡландырып ерҙе, күкте.* М. Кәрим.

**ҺОҠЛАНЫУ** *ҡ.* Бик яҡшы, матур нәмәгә таң ҡалып ҡарау, кинәнеү, шатланыу. *Һоҡланып ҡарау. Күреп һоҡланыу.* ■ *Ҡарт сәсән ана шулай үҙе йәшәгән ерҙең байлығына, матурлығына һоҡланып ҡобайыр әйтте, ти* (Әкиәттән). *Зәлифәкәй һылыу буйға еткәс, һоҡланмаған кеше ҡалманы* (Халыҡ йырынан).

**ҺОҠЛАНЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **һоҡланыу.** *Һоҡланышып ҡарау.*

**ҺОҠҺОҠ** *и. диал.* Ҡашыҡморон.

**ҺОҠҺОР** *с.* Ашауға ҡомһоҙ, ҡомағай, ҡомһоҙ. *Һоҡһор мал. Һоҡһор кеше.*

**ҺОЛ** *и. диал.* Оҫол.

**ҺОЛАУ** *ҡ. диал.* Лыпын һуҙылып төшөү. *Һолап ятыу.*

**ҺОЛЛАНЫУ** *ҡ.* Һәләтлегә, булдыҡлыға әйләнеү. *[Бәхтейәр:] Һуғыш йылдарында үҙ алдарына донъя көтөп һолланып бөткән бисәләргә тауыҡ кетәге һалыу нимә ул.* М. Хәйҙәров.

**ҺОЛЛАУ** *ҡ.* Ялмап йотоу; һоғоноу. *[Ҡарт] ҡаҙандағы итте һоллап, ишектән сығып та һыҙған* (Әкиәттән).

**ҺОЛЛО** *с.* **1.** Көслө, ҡеүәтле. *Һолло булыу.* ■ *Һолло, баһадир улдарың ныҡ һаҡлай Ватан һағын, тыныс бул, тыуған ягым!* А. Игебаев. *Көс ташына ташҡын күкрәктә. Һоҫоп алып, сөйөп- ырғытырға ярһып тора һолло беләк тә!* Ғ. Амантай.

**2.** Һәләтле, булдыҡлы, уңған, етеҙ. *Үҙе [еңгәм] эшкә етеҙ, үҙе һолло, йәлеп итә бөтә күңелде.* Б. Вәлит. *Данлайһың һин һолло, таһыл егеттәрҙе, һөнәрмән һәм эшкә әүҙем ил ҡыҙҙарын.* А. Игебаев.

**ҺОЛО** *и.* **1.** Ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған, ялбыр башаҡлы, көплө орлоҡло һабан ашлығы. *Һоло баҫыуы. Һоло сәсеү. Һоло урыу. Һоло үҫтереү.* ■ *Бригада иртә ашлыҡтарҙы сәсеп бөтөү алдында тора. Тағы биш гектар һоло сәсәһе .. ҡалған.* Б. Бикбай.

**2.** Шул ашлыҡтың орлоғо. *Һоло оно. Һоло ярмаһы. Һоло бутҡаһы. Атҡа һоло ашатыу.* ■ *Буҙаны уны .. һоло йәки арпа ярмаһынан әсетеп эшләйҙәр.* С. Агиш.

♦ **Ҡара һоло** ялбыр башаҡлы, орлоғо оҙон һолоға оҡшаған ҡый үләне.

● *Ат тартмай, һоло тарта.* Мәҡәл.

**ҺОЛОБАШ** *и.* Ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған һоло башлы болон үләне.

**ҺОЛТАН** *и. ҡар.* **солтан** 1.

**ҺОЛҺОЛ** *и. диал.* Һөҙһөт.

**ҺОМАЙ** *и.* **1.** (*йәки* **һомай ҡош**) Хөрәфәт буйынса: күләгәһе кемгә төшһә, шуға бәхет килтерә тип һаналған изге мифик ҡош (йәнәһе гел күктә йәшәй).

**2.** (*баш хәреф менән*) Урал батыр эпосындағы Самрау батша ҡыҙының исеме. *Самрау тигән батшаның Һомай тигән ҡыҙымын; алтын сәсем тарҡаһам, нурға илде күмәмен.* «Урал батыр».

**ҺОМҒОЛ** *с.* Нәҙек оҙон, ҡупшы, зифа буйһынлы. *Һомғол кәүҙә. Һомғол ағас.// Һомғол атлау.* ■ *Булмәгә .. ҡыҙҙар кеүек һылыу ғына йөҙлө һомғол егет килеп инде.* Р. Солтангәрәев. *Тал сыбыҡтай һомғол буй-һыныңды, күҙҙәреңдең моңһоу ялҡынын нисек күрмәҫкә һуң?!* Р. Ғарипов. *Ташлы тауҙың киртләс ҡаяһында баҫып тора һомғол ҡоралай.* Ҡ. Даян. *Зөһрә һылыу кәүҙәһен килешле, етеҙ хәрәкәтләндереп, һомғол атлап ары китте.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҺОМҒОЛЛОҠ** *и.* Матурлыҡ, күркәмлек, ҡупшылыҡ. *Уҡытыусы кешегә оҙон толомло сәс килешә ул. Йөҙөнә, буй-һынына ла үҙенсә бер һомғоллоҡ бирә.* М. Тажи. *Уразхан Бабсаҡты күргән икән, һомғоллоғон, батырлығын белгән икән.* „Бабсаҡ менән Күсәк“.

**ҺОНДОР** *с.* Килбәтһеҙ оҙон аяҡлы, оҙон буйлы. *Әскәтебеҙ .. һондор кәүҙәһен боршанлатып, ҡултыҡ аҫтынан ғына йөрөгән бер математик ҡыҙ менән әйләнә.* Н. Мусин.

**ҺОНОҠ** *с.* **1.** Тейешле саманан тыш һонолоп торған, яҙынҡы. *Һоноҡ салғы. Һоноҡ ураҡ. Муйыны һоноҡ.*

**2.** *кусм.* Эйелергә иренгән, ялҡау, булдыҡһыҙ. *Һоноҡ кеше.*

**ҺОНОЛОУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **һоноу** 2. *Һонолған ҡул.*

**2.** Оҙон булып һуҙылыу. *Һонолған муйын. Һонолоп ятыу.* ■ *Ул [ат] аяҡтарын ташлап, һонолоп елә ине.* Я. Вәлиев.

**3.** Һуҙылып ынтылыу. *Һонолоп алыу. Һонолоп ҡарау.* ■ *Малай үләнгә һонолған атының теҙгенен тартты ла алға сабып китте.* Ш. Янбаев.

♦ **Һонолоп һыу эсмәү** бер нәмә лә эшләмәй, рәхәткә һалышып ятыу. *Ныязғол хәҙер ҡайһылай булып китте: һонолоп һыу ҙа эсмәй.* Һ. Дәүләтшина.

**ҺОНОУ** *ҡ.* **1.** Оҙон итеп һыҙыу. *Аяҡты һоноп ултырыу. Муйынды һоноу.* ■ *Дөйә бара, һоноп-һоноп аҙымдарын тигеҙ ала.* Ш. Ғәлин.

**2.** Кемгә йәки нимәгәлер ынтылып һуҙыу (аяҡ, ҡулды). *Асыя ут эргәһендәге түмәрсәгә ултырҙы, һыуланып ҡорошҡан ҡулын утҡа һондо.* Н. Иҙелбай.

**3.** Кемгәлер бер нәмәне тоттороу, биреү өсөн һуҙылып ынтылыу. *Хатты бер аҙ тотоп ултырғас, әсәйемә кире һондом.* Н. Мусин.

♦ **Ҡул һоноу** үҙеңә тейеш түгел нәмәне үҙләштерергә тырышыу. *Кеше мөлкәтенә ҡул һоноу.* ■ *Ярһыу атта һыбай уҙһа, уға ҡарап ынһынмайым, буйым етмәҫ ағастарҙың емешенә ҡул һонмайым.* М. Кәрим. **Ярҙам ҡулы һоноу** ярҙам итергә әҙерлек белдереү.

**ҺОНТАЙЫУ** *к.* Буйға оҙон булып үҫеп китеү, оҙонайыу (бала-саға, йәштәргә ҡарата). *Һонтайып үҫеп китеү.*

**ҺОНТОР** *с. кар.* **һондор.** *Һонтор булып үҫеп китеү.* ■ *Балаҡтарын резина итек ҡунысына һалып кейгән салбары уның [Тәкбировтың] былай ҙа һонтор кәүҙәһен тағы ла оҙонораҡ күрһәтә.* Н. Мусин.

**ҺОҢҠОЛДАУ** *к. кар.* **һупылдау.**

**ҺОҢҠОЛДАУЫҠ** *и. диал.* Мөнһөгөр.

**ҺОП** *ымл.* Нимәнелер күтәргәндә йәки бейеккә менгәндә көс биреү өсөн әйтелә. *Һоп, егеттәр, тиҙерәк каяға ынтылығыҙ.*

**ҺОП-** *киҫ.* **һо**ᵽ ижеге менән башланған сифат һәм рәүешкә ҡушылып, мәғәнәһен көсәйтә. *Һоп-һоро. Һоп-һоноҡ.*

**ҺОР** *с. кар.* **һоро.** *Һор айыу.* ■ *Ҡаһым түрә менгән һор юрғаның маңлайында булыр урайы* (Халыҡ йырынан).

**ҺОРАЛЫУ** *к. төш. кар.* **һорау**[1] 5.

**ҺОРАНСЫҠ** *с.* Кешенән гел ниҙер һорап, һоранып йөрөүсән. *Һорансыҡ кеше. Һорансыҡ булыу.*

**ҺОРАНЫУ** *к.* **1.** Кешенән алыр өсөн гел ниҙер һорау.

**2.** Хәйер һорау. *Һоранып йөрөү. Һоранып ултырыу. Һоранып тамаҡ туйҙырыу.*

**ҺОРАТЫУ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **һорау**[1] 3. *Шул арала батша ҡыҙы үҙе лә һыңар ҡатаны һоратып алды, ти* (Әкиәттән).

**2.** Туй йолаһы буйынса, кәләш әйттергәндә ҡыҙға яусы арҡыры тәҡдим яһатыу; ҡыҙ яусылау. *Бер егет буй үҫтергәс, мыйыҡ еткергәс, өйләнергә булған. Күрше ауылдан матур ғына бер ҡыҙҙы һоратып яусы ебәргән* (Әкиәттән).

**ҺОРАУ**[1] *к.* **1.** Кем йәки ниҙер тураһында мәғлүмәт алыр, белер өсөн кешегә мөрәжәғәт итеү, өндәшеү. *Юл һорау. Һорап белеү.* ■ *«Ә һин кем булаһың?» — тип һораған Буҙансы батыр.* (Әкиәттән). *«Нишләп һине бәйләнеләр, туғанҡай?» — тип һораны, ти, егет* (Әкиәттән). *Салауаттың йәшен һораһағыҙ, егерме лә ике йәшендә* (Халыҡ йырынан). / Һорау биреп кешенең белем кимәлен тикшереү. *Уҡыусынан үткән дәресте һорау.*

**2.** Кемделер күрергә йәки уның менән һөйләшергә теләк белдереп мөрәжәғәт итеү. *Телефондан иптәште һорау.* ■ *Яланбикә һыйыр һауырға ҡураға сыҡкан Мәғфирәне һораны: „Енгәм ҡайҙа китте?"* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Кемдәндер бер нәмә алырға теләп мөрәжәғәт итеү. *Аҡса һорау. Ашарға һорау. Икмәк һорау. Йомош һорау. Эш һорау. Эш хаҡы һорау. Һорап алыу.* ■ *[Карт:] Ул бөгөн бик һыҙланды. Төнө буйы һыу һораны, уға һыу бирмәй әтләнеләр.* С. Агиш. *Кәләше Янһарыға: „Улай булғас, бар, батшанан бер өс көн ваҡыт һора, әмәлен табырбыҙ", — ти* (Әкиәттән). *[Ҡыҙ — Һәүбәнгә:] Егеткәйем, шаулама, атым һорап даулама.* „Аҡбуҙат". / Бер төрлө теләк, талап менән мөрәжәғәт итеү. *Аҡыл һорау. Кәңәш һорау.* ■ *Дүрт ырыуҙың батырынан ярҙам һорап, шул ваҡыт Мәсем хан бер хәбәр аскан.* „Бабсаҡ менән Күсәк". *Хәйерсе балды әсеп ебәргән дә бер йыр йырларға батшанан рөхсәт һораған* (Әкиәттән).

**4.** Кемдәндер бер нәмә эшләргә үтенеү. *Үтенеп һорау. Ялбарып һорау.* ■ *Ҡабатланмаҫ йырым, һүнмәҫ йондоҙом! Тыңла мине, һорайым, йом күҙең.* Ғ. Хәйри. *Батша таҙҙы һарайына алып инеп ашатты-эсерҙе лә, теге төштө һөйләп биреүен һораны, ти* (Әкиәттән)./ Ризалыҡ, рөхсәт алыу. *Ризалыҡ һорау. Һорап китеү. Рөхсәт һорау. Һорап эшләү.* ■ *[Хафиз ҡарт:] Шулай шул, Зыя ҡустым .. Өфөгә барып, командирҙан һораһаң, ҡайтарып та ебәреүе бар.* М. Тажи. *[Биктимер] һораунһыҙ-ниһеҙ инә лә: „Иҫәнме, һаумы?" — тип иҫәнләшә* (әкиәттән).

**5.** *этн.* Яусы аша ҡатын булырға тәҡдим яһап мөрәжәғәт итеү; һоратыу. *Ҡыҙ һорау.* ■ *Күршеләргә ситтән яусы килгән, әллә ниңә, әллә ниңә һорамай* (Халыҡ йырынан).

**6.** *һөйл.* Сауҙа һәм алыш-бирештә нимәгәлер хаҡ ҡуйыу. *Арзан һорау. Күп һорау.* ■ *[Үмәр:] Бынау өс тинлек ҡарағаға ҡырҡ ете тин һорай. Бер тин төшмәй, йөҙө ҡара.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Һаулыҡ һорау** иҫәнләшеү.— *„Һау ҡайттыңмы, улым?" — ти атай, һаулыҡ һорай.* Ш. Бабич. **Һорама инде** һорауға ҡаршы нимәнәндер ризаһыҙ икәнде белдереп яуап биргәндә әйтелә. *[Ҡарт:] Һорама инде, улым, көн күреүе бик ауыр бында* (Әкиәттән).

● *Кем икәнеңде белгең килһә, ҡыҙ һорат.* Әйтем. *Күп йәшәгәндән һорама, күп йөрөгәндән һора.* Мәҡәл. *Үҙе уңған егеттең ата-инәһен һорама.* Мәҡәл.

**ҺОРАУ**[2] *и.* **1.** Яуап алыу маҡсатында әйтелгән һүҙ. *Һорауға яуап ҡайтарыу.* ■ *Ҡапыл үҙенән оло бер һорау бирҙе ҡыҙым: „Әйт әле, ватан ни нәмә була ул?" — тине ҡыҙым.* Р. Ниғмәти. *Егет башта ҡыҙҙың һорауҙарына ҡаршы өндәшмәй ултырған* (Әкиәттән). / Имтиханда яуап талап иткән мәсьәлә. *Һорауға яуап биреү.*

**2.** Тауарға һ. б. булған талап. *„Мир" фабрикаһында тегелгән джерси пальтоларына һорау ҙур.* „Башҡортостан ҡыҙы". 1969, № 3. *[Ныязгол:] Хәҙер игенгә сит илдән һорау күп.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Ниҙер теләп белдерелгән үтенес. *Һорауҙы үтеү. Һорауҙы кире ҡағыу.*

♦ **Һорау алыу** енәйәтте һ. б. тикшергәндә ғәйепләнеүсене, шаһитты һ. б. һөйләтеп мәғлүмәттәр туплау.

**ҺОРАУЛЫҠ** *и.* Махсус темаға төҙөлгән һорауҙар теҙмәһе. *Һораулыҡ төҙөү.* ■ *Беҙ инде хәҙер үҙебеҙҙең һораулыкка оран, тамға, ҡош һәм ағас кеүек төшөнсәләрҙе лә өҫтәйбеҙ.* К. Мәргән.

**ҺОРАШЫУ** *к. урт. кар.* **һорау**[1] 1, 2. *Һорашып белеү. Төпсөп һорашыу.* ■ *Ҡарттар оҙон*

*хәбәр асып, хәҙерге Ҡыҙыл Армияны, ундағы тәртипте һораштылар.* Ғ. Дәүләтшин.

♦ **Иҫәнлек-һаулыҡ һорашыу** иҫәнләшеү. **Һаулыҡ һорашыу**, иҫәнләшеү. *Гөлйөҙөм .. һаулыҡ һорашып бөткәс тә: — «Ағайымдан яҙ башынан бирле хат юк»,— тип илап ебәрҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**ҺОРҒОЛТ** *с.* Асыҡ һор, аҡһыл һор. *Һорғолт күҙ. Һорғолт төҫ.* ■ *Һорғолт уба артынан йәйге ҡояштың тәүге нуры һибелде.* Ә. Вәли. *Күк йөҙө һорғолт болот, йәмһеҙ томан күктең сите.* Ш. Бабич.

**ҺОРҠА** *и.* Һор төҫтәге ат.

**ҺОРҠОТ** *с. диал.* Һуйҙан.

**ҺОРЛАН** *с. диал.* Һорғолт. Ҡаялыла тауҙың ай бүреһе, күк һорлан да икән күбеһе (Халыҡ йырынан).

**ҺОРЛАУ** *с. диал.* Һорғолт.

**ҺОРНАЙ** [*фарс.*] *и.* Тынлы музыка ҡоралы; борғо. *Һорнай уйнау.* ■ *Һалдат беҙҙе күреү менән һорнайын ауыҙына ҡуйып сигнал уйнатырға тотонды.* М. Тажи.

**ҺОРНАЙҒАН** *с.* Нәҙек оҙон буйлы.

**ҺОРНАЙСЫ** *и.* Һорнай уйнаусы.

**ҺОРНАЙЫУ** *к.* Нәҙек оҙон булыу. *Һорнайып үҫеп китеү.* ■ *Хәтерләйем, әсәйем атайымды ябыҡлығы, мөһабәт, олпат булмауы менән битәрләй торғайны: «Һинең ни, бахыр, муйыныҥ һорнайып, уңәсең әлмәйеп бер килбәтең юҡ бит».* З. Биишева.

**ҺОРНАУ** *к.* Һорнай уйнау, һорнау тауышы сығарыу. *Матур һорнау.* ■ *[Заятүләк:] Думбырам минең уйнайҙыр, ҡыл ҡумыҙым һорнайҙыр, тыңлай килгән әҙәмдәр үҙен-үҙе белмәйҙер.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ҺОРО** *с.* **1.** Ҡара менән аҡ төҫтәге ҡушылдығынан торған буҙ төҫ, көл төҫө. *Һоро болот. Һоро йылан. Һоро костюм. Һоро айыу. Һоро шинель. Һоро юрға.* ■ *Ҡышҡы сатнап торған һыуыҡ көндә йылы түгел һоро шинелдә.* М. Хәй. *Быҫҡаҡлап ямғыр яуа, ағыла һоро болот.* А. Игебаев.

**2.** *диал.* Көрән.

♦ **һоро ҡорт** *ҡар.* **ҡорт**[1].

● *Йыландың ҡараһы ла йылан, һороһо ла йылан.* Мәҡәл.

**ҺОРОЛАНЫУ** *к.* Һоро төҫкә инеү, һоро булыу. *Ел ҡайырған түбәләр һәм тау ҡашлаҡтары ғына һоролонып күренә.* Ә. Вәли.

**ҺОРЫН** *и. иҫк.* Ҡобайыр.

**ҺОС: һос ҡылыу** *иҫк.* 1) тайыу, кәйелеү. *Ҡылыс һос ҡылды;* 2) *күсм.* гөнаһ, яҙыҡ ҡылыу. *[Йософ:] Ҡәрҙәштәрем, өмөттәрем, .. мин һеҙҙәргә ни һос ҡылдым?* «Йософ вә Зөләйха».

**ҺОҪА** *и.* **1.** Туҡыу станында шүрене ҡуйыу һәм йөрөтөү өсөн эсе ҡыуыш итеп яһалған оҙонса ағас ҡорал; шүре ояһы. *Һоҫа ҡуйыу. Һоҫаны ҡайындан яһау.* ■ *[Нәсимә] һоҫаһын бер уңға, бер һулға елдереп шыуҙыра, табансаларын бер өҙлөкһөҙ йәлт-йәлт баҫа башланы.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *диал.* Ҡорт ҡашығы, һоҫҡо.

**ҺОҪҠАҠ** *и. диал.* Һоҫҡо. *Бер һоҫҡаҡ күмер.*

**ҺОҪҠО** *и.* **1.** Ҡуҙ, көл йәки бүтән төрлө ваҡ нәмәне һоҫоп, йыйып ала торған ҡорал. *Тимер һоҫҡо. Ағас һоҫҡо.* ■ *Ҡыҙ иҙәнде һепереп, сүп-сарҙы һоҫҡоға ышырҙы ла мейескә ташланы.* Й. Солтанов. *Төлкө бүрене тирмә ташы өҫтөнә ултыртты ла бер һоҫҡо он бирҙе ти* (Әкиәттән).

**2.** Ер соҡоғос машинаның балсыҡ-ташты һоҫа торған өлөшө. *Рөстәм машинаның һоҫҡоһон йомшаҡ тиреҫкә батыра. Бер нисә һоҫҡо һалып менән арба тула.* Р. Солтангәрәев.

**ҺОҪЛАН** [*рус.* суслон] *и.* Теҙеп ултыртып береһе өҫтән һалынған бер нисә көлтә. *Бөтә тирә яҡта сабылған яҫмалар ята. Уларҙы көлтәләргә бәйләйҙәр, һоҫландарға һалалар, йөкк тейәп ташыйҙар.* Ғ. Ибраһимов.

**ҺОҪОУ** *к.* Нимәнеңдер эсенә һауытты батырып ебәреп бер өлөшөн алыу. *Аш һоҫоу. Һыу һоҫоу. Сүмес менән һоҫоу. Һоҫоп алыу.* ■ *Хөмәйрә .. шишмәнән етеҙ генә тоноҡ һыу һоҫоп алып, .. егеткә тотторҙо.* Ф. Иҫәнғолов. *Сәйҙеямал табаҡҡа үрелде. Ләкин һалманы һоҫманы. Ҡалағын табаҡ ситенә кире ҡуйҙы.* Я. Хамматов.

**ҺОҪОШОУ** *к. урт. ҡар.* **һоҫоу.** *Аш һоҫошоу.*

**ҺОҪТОРОУ** *к. йөкм. ҡар.* **һоҫоу.**

**ҺӨБӘ** *и. диал.* Һебә. *Һөбә йыйыу. Ҡолғағы һөбә тағыу.*

**ҺӨҘГӨ** *и.* Балыҡты һөҙөп тота торған ау йылым. *Ҡүлендә балыҡ булмаһа, асыуланма һөҙгөгә.* Б. Вәлит.

**ҺӨҘГӨС** [1] *и.* **1.** Шыйыҡ нәмәне һөҙөп таҙарта торған иләк һымаҡ нәмә. *Ҡымыҙ һөҙгөсө.* ■ *Әсәйем биҙрәне тултырып йылы һөт алып инә лә .. һөҙгөстән үткәреп, миңә бирә.* Н. Ҡотдосов.

**2.** *диал.* Һөҙгө.

**ҺӨЗГӨС** [2] *и.* Ҡайын туҙын ҡырҡа торған ҡорал.

**ҺӨҘГӘК** *с.* Һөҙә, төкөй торған ғәҙәте булған. *Һөҙгәк үгеҙ. Һөҙгәк тәкә. Һөҙгәк булыу.* ■ *Көтөүҙәге һөҙгәк кәзә тәкәһе килеп етте тип ҡурҡып, тиҙ генә тороп киттем.* З. Ғәлимов.

**ҺӨҘҘӨРӨҮ** *к. йөкм. ҡар.* **һөҙөү**[2]. *Һөттө һөҙҙөрөү.*

**ҺӨҘЛӨК** *и.* Итле һурпа өҫтөнә ҡайнап сыҡҡан май; тоҙлоҡ. *Аштың һөҙлөгөн алыу.* ■ *Һөҙлөктә генә бешкән йоҡа һалма ла, һимеҙ һарыҡ ите лә гәжәп тәмле ине.* З. Биишева.

**ҺӨҘЛӨКЛӨ** *с.* Һөҙлөгө күп, һөҙлөгө бар. *Һөҙлөклө аш. Һөҙлөклө һурпа.* ■ *Һимеҙ тауыҡтың һөҙлөклө һурпаһында бешкән тәмле тукмас минең күҙ алдыма килеп баҫҡандай булды.* В. Исхаков.

**ҺӨҘЛӨКЛӘНЕҮ** *к.* Һөҙлөгө барлыҡҡа килеү, һөҙлөклө булыу. *Һөҙлөкләнеп бешкән аш.*

**ҺӨҘМӘ** *и.* Һыуын һарҡытҡан ҡуйы ҡатыҡ; һөҙмәс. *Һөҙмә яһау.* ■ *Ҡатын тағы һөҙмә килтереп ултырта. Күсәкбай хәнйәрен сығарып һөҙмәне өскә булә лә береһен эткә ташлай, бер өлөшөн ағасҡа сәсрәтә һуға.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ҺӨҘМӘС** *и. ҡар.* һоҙмә.

**ҺӨҘӨК** *и . ҡар.* **һөҙлөк.**

**ҺӨҘӨЛӨҮ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **һөҙөү** [1] 1, 2. *Һөҙөлгән һөт.*

**2.** Йоҡомһорап, томанланып йомолоу (күҙгә, керпектәргә ҡарата). *Аҡназарҙың күҙҙәре һөҙөлгән , .. ул әкрен генә ҡалғый ине.* Ғ. Дәүләтшин. *Йоҡоларым килә ай күҙемә, күҙ керпекәйҙәрем һөҙөлә* (Халыҡ йырынан).

**3.** Керпекте төшөрә биреп, серле ҡараш ташлау. *Һөҙөлөп ҡарау.* ■ *Йомағол үпкәләү ҡатыш Сәғиҙәгә һөҙөлөп ҡарап ҡуйҙы.* М. Тажи. *Йола белмәҫ еҙнәгә ҡыҙын табып бирмәбеҙ, һөҙөлөп торған күҙҙәрен бүләкһеҙ ҡалдырмабыҙ.* М. Буранғолов.

**ҺӨҘӨМТӘ** *и.* Нимәнеңдер иң һуңынан дөйөмләштереп яһалған бер фекер, йомғаҡ; нәтижә. *Ыңғай һөҙөмтә. Кире һөҙөмтә. Эш һөҙөмтәһе. Һөҙөмтә биреү. Һөҙөмтә сығарыу. Һөҙөмтә яһау.* ■ *Төрлө фекер йөрөтәбеҙ, ләкин .. бер һөҙөмтәгә лә килә алмайбыҙ.* Д. Юлтый.

**ҺӨҘӨМТӘЛЕ** *с.* Һөҙөмтәһе яҡшы; уңышлы. *Һөҙөмтәле эш. Һөҙөмтәле булыу.* ■ *Хеҙмәт һөҙөмтәле булһын өсөн кеше дөрөҫ ял итергә тейеш.* В. Ғүмәров.

**ҺӨҘӨМТӘЛӘ** *инш.* Һуңғы сиктә; нәтижәлә. *Епшек көндәрҙә ҡар өҫтән ирей. Һөҙөмтәлә, боҙ ҡатламы барлыҡҡа килә.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 1 февраль.

**ҺӨҘӨМТӘЛӘҮ** *ҡ.* Һөҙөмтә яһау. *Телмәрҙе һөҙөмтәләп ҡуйыу.*

**ҺӨҘӨМТӘҺЕҘ** *с.* Һөҙөмтәһе, нәтижәһе насар; уңышһыҙ. *Һөҙөмтәһеҙ эш. Һөҙөмтәһеҙ булыу.*

**ҺӨҘӨҮ** [1] *ҡ.* Мөгөҙ менән төртөү, төкөү (ғәҙәттә һыйыр малына ҡарата). *Йәтим ҡалған быҙау килеп, баҡырып һөт һораһа, һыйыр ҙа уны ҡабул итмәй, һөҙөп ебәрә.* М. Ғафури.

**ҺӨҘӨҮ** [2] *ҡ.* **1.** Шыйыҡ нәмәне таҙартыу өсөн ниҙер аша үткәреү. *Ҡымыҙҙы һөҙөү. Һурпаны һөҙөү.* ■ *Гөлниса инәй яңынан һөт һөҙөргә тотондо.* Ә. Зәйнуллин.

**2.** Йылым йәки башҡа бер нәмәне һыуҙан тартып ниҙер тотоу. *Балыҡ һөҙөү. Һөҙгө менән һөҙөү.* ■ *Малайҙар йыйнаулашып ҡылыла ыштан менән балыҡ һөҙәләр.* Ғ. Амантай.

**3.** Ниҙер эҙләп, бер ерҙе ҡалдырмай тотош ҡыҙырып ҡарау (ғәҙәттә урманға ҡарата). *Байҙар, батша һалдаттары был урманды нисәмә тапҡыр һөҙөп сыҡҡандар, әммә Хәбир батырҙы таба алмағандар.* З. Биишева.

**4.** Тотош рәттән ныҡ ҡарау; тирә-яҡты байҡау. *Әхмүш асыулы күҙҙәре менән бөтә йортто һөҙөп сыҡты.* Д. Юлтый. Һөҙә (*йәки* һөҙөп) ҡарау күҙҙе төбәп, ныҡ итеп иғтибар менән ҡарау. *Һөҙөп ҡарап алыу.* ■ *— Әллә береһе лә өйҙә юҡ инде быларҙың,— тине килеп инеүсе өй эсен бер һөҙөп ҡарап сыҡҡас.* Ж. Кейекбаев.— *Бик һәйбәт эш ўйлап йөрөйҙәр улар [уҡыусылар],— тине директор, көмөш ситле күҙлегенең өҫтөнән һөҙә ҡарап.* К. Мәргән.

**ҺӨҘӨШКӘК** *с. ҡар.* **һөҙгәк.** *Һөҙөшкәк үгеҙ.*

**ҺӨҘӨШӨЎ** *ҡ. урт. ҡар.* **һөҙөү** [1]. *Ике тәкә ҡанға туҙып һөҙөшөп ята, ти* (Әкиәттән).

● *Тәкәләр һөҙөшкәндә кәзәләр ял итә.* Әйтем. *Һөҙөшкән һыйырға хоҙай мөгөҙ бирмәгән.* Мәҡәл.

**ҺӨҘҺӨТ** *и.* Елпеүес һымаҡ супайлы, кәкре суҡышлы сыбар ҡош.

**ҺӨҘӘГӘЙЕҮ** *ҡ.* Һөҙәккә әйләнеү, һөҙәк булыу. *Әйгә етәрәк тауҙар бөтөнләй һөҙәгәйә, .. иркен тугайҙар яһай.* Н. Мусин.

**ҺӨҘӘГӘЙТЕҮ** *ҡ.* Һөҙәккә әйләндереү, һөҙәк итеү. *Һалдаттар ярҙы һөҙәгәйтеп, юл яһайҙар.* Ф. Исәнғолов.

**ҺӨҘӘК** *с.* Әҙләп кенә үргә күтәрелгән йәки түбәнгә табан төшкән, киреһе текә. *Һөҙәк тау. Һөҙәк үр. Һөҙәк һырт. Һөҙәк урын. Һөҙәк булыу.* ■ *Аҡ ҡуяндар кеүек, аҡ түлкындар үрләй ине һөҙәк ярҙарға.* Х. Ҡунаҡбай.

**ҺӨҘӘКЛЕК** *и.* Һөҙәк ер. *Һөҙәклеккә етеү.* ■ *Бурыл ат Базы һыуы буйына етәрәк һөҙәклекте һиҙеп етеҙерәк юртырға тотонδо.* Ә. Байрамов.

**ҺӨҘӘКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Һөҙәккә әйләнеү, һөҙәк булыу. *Һыуҙың ярына табан ҡая һөҙәкләнә төшә.* Ә. Вахитов.

**ҺӨҘӘКЛӘҮ** *ҡ. ҡар.* **һөҙәгәйтеү.** *Көрәк менән ер ҡаҙалар. Танкылар үтер өсөн ярҙы һөҙәкләйҙәр.* Н. Ҡәрип.

**ҺӨҘӘКӘС** *с. диал.* Һөҙгәк. *Һөҙәкәс тана.*

**ҺӨЖӨРӨҮ** *ҡ.* Үткер нәмә менән һыҙыра төртөп ҡырыу; һөжөү. *Төрпө менән солоҡ эсен һөжөрәләр.*

**ҺӨЖӨҮ** *ҡ. ҡар.* **һөжөрөү.**

**ҺӨЖҮМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Хәрби көстәрҙең алға барышын тәьмин итеү өсөн дошманға ҡаршы йүнәлтелгән һуғыш. *Көслө һөжүм. Һөжүм башлау. Һөжүмгә күсеү.* ■ *Башҡорт атлылары бөйөк һөжүмдең тәүгә көнөндә күрше частар менән берлектә өс ауылды дошмандан таҙартты.* С. Әлибаев./ Дошман өҫтөнә йүнәлтелгән киҫкән ынтылыш; атака. *Һөжүмгә ташланыу.*

**2.** Кемдеңдер тормошона, нимәнеңдер именлегенә зыян килтереү өсөн йүнәлтелгән эш, хәл (талау, юҡ итеү һ. б. маҡсат менән). *Һөжүм яһау.* ■ *Теге шпаналар беҙгә һөжүм башланылар .. Улар беҙгә ҡаршы ойошоп эш ҡүрә, бөтә нахаллыҡты, этлекте эшләргә тотондолар.* С. Агиш.

**3.** *спорт* Футбол, хоккей, баскетбол һ. б. уйындарҙа ҡаршы яҡты ҡыҫырыҡлау, уйында өҫтөнлөк алыу. *Ҡаршы яҡ ҡапҡаһына һөжүм. Уйында һөжүмгә күсеү.*

□ **һөжүм итеү** 1) һуғыш хәрәкәттәре менән дошманды ҡыҫырыҡлау. *Перемышль алыныу менән беҙ был яҡтан һөжүм итергә тейешбеҙ. Тиҙерәк мир яһау өсөн ныҡырыҡ һуғышырға кәрәк!* Д. Юлтый; 2) кемдеңдер тормошона ҡурҡыныс тыуҙырыу; һөжүм яһау. *Алда ҡурҡыныс рәүештә аҡ айыу баҫып тора, әйтерһең быуа, быуа осраған берәүгә һөжүм итергә, иҙеп ташларға әҙерләнгән* (Әкиәттән). *Бер нисә полицай ҡамсы менән эшселәргә һөжүм итә башланы. Ул арала полицайҙар өҫтөндә һауаға күтәрелгән таштар күренделәр.* Д. Юлтый; 3) спорт уйындарында, ҡаршы яҡтарҙы ҡыҫырыҡлау, сигенергә мәжбүр итеү.

**ҺӨҘ** *өнд. ҡар.* **һөс.**

**ҺӨЗЗӨЙ** *өнд. ҡар.* **һөс.** *Ана бүре! Ана, тотоғоҙ! Аҡбай, Һорлаҡ, әйҙә һөззөй, һөззөй, һөз!* Д. Юлтый.

**ҺӨЗЛӘҮ** *ҡ.* **1.** *ҡар.* **һөсләү.**

**2.** Орғасы һорап ыҙылдау, мөңрәү (үгеҙ малына ҡарата).

**3.** *күсм. һөйл.* Нишләргә белмәй сабыулау. *Һөзләп йөрөү.*

**ҺӨЗӨЛДӘТӘҮ** *к. кар.* **һөсләтеү.**

**ҺӨЗӨЛДӘҮ** *к.* **1.** *кар.* **һөсләү.** *Әтте һөзөлдәү.*

**2.** *күсм. һөйл.* Нишләргә белмәй туҙыныу, сыпранлау. *Һөзөлдәп сығып китте.*

**ҺӨЙГӘН** *с.* **1.** Күңелгә ныҡ яҡын булған, уға ҡарата тоғролоҡ, яҡынлыҡ тойғолары һаҡлаған; һөйөклө. *Һөйгән бала. Һөйгән әсә. Һөйгән ил.*/ Күңелгә оҡшаған, ҡыҙыҡһыныу уятҡан. *Һөйгән эш.*

**2.** Һөйөү, мөхәббәт тойғоһо, яратыу хисе йүнәлтелгән (икенсе енес кешеһенә ҡарата). *Һөйгән егет. Һөйгән ҡыҙ. Һөйгән йәр.*

**3.** *и. мәғ.* Яратҡан һөйгән кеше (икенсе енес кешеһенә ҡарата). *һөйгәнеңә хат яҙыу.* ■ *Аҙнагол ҡайтып китә. Зөлхизә моңға бирелә. Һөйгәненә арнап йыр сығара.* З. Биишева. *Яңғыҙлыҡтан тоя алмайым яҡты донъяның йәмен, һөйгәнемә ҡауыша алмай янамын да кейәмен.* Н. Иҙелбай.

**ҺӨЙҘӨРГӨС** *с.* Боронғо хөрәфәт буйынса, үҙеңде берәүҙән яраттырыу өсөн төрлө им-том доғаһы уҡып өшкөртөлгән нәмә (ғәҙәттә бетеү итеп тағып йөрөгәндәр). *Һөйҙөргөс өшкөртөп алыу.* ■ *[Марианна:] Ярата. Яратмаһа, һөйҙөргөс яһарбыҙ.* И. Абдуллин.

**ҺӨЙҘӨРӨҮ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **һөйөү**[1] 3.

**2.** Һөйөү тойғоһо уятыу. *Йәш бала һөйҙөрә.* ■ *Һөйәм тиһәм, тормош нәфрәт бирә, нәфрәтләнер саҡта һөйҙөрә.* Р. Бикбаев. *Ҡара, ҡара атаһы! Ҡара ниндәй һикерә! Талпынып та йылмайып һөймәҫ ерҙән һөйҙөрә.* Ғ. Амантай.

♦ **Килен һөйҙөрөү** *этн.* киленде күрһәтергә саҡырыу, килен сәйе эсереү (килен төшкәндең иртәгеһенә үткәрелә; сәйгә килгән ҡатын-ҡыҙ киленде яурынынан һөйөп бүләк һала).

● *Бала саҡта һөйҙөрә, үҫә килә көйҙөрә.* Әйтем. *Көйҙөргән дә — тел, һөйҙөргән дә тел.* Мәҡәл. *Тел һөйҙөрә, тел көйҙөрә, тел көлдөрә, тел бөлдөрә.* Мәҡәл.

**ҺӨЙКӨМ** *и.,* **һөйкөм һөйәге** Кешенең үҙен яраттырып, күңелде тартып торған булмышы. *Балаһы бигерәк һөймәлекле, һөйкөм һөйәге барҙыр.*

**ҺӨЙКӨМЛӨ** *с.* Күңелгә килешле, һөйҙөргөс. *Һөйкөмлө бала. Һөйкөмлө ҡыҙ.* ■ *Ирйегет тә, тап бына ошо хәҙерге Аҙнагол кеүек, үтә һөйкөмлө, мөләйем кеше ине бит.* З. Биишева.

**ҺӨЙКӨМҺӨҘ** *с.* Күңелгә оҡшамай торған, һөйкөмлө түгел. *Һөйкөмһөҙ кеше. Һөйкөмһөҙ булыу.* ■ *Йорт хужаһы .. кескәй битле, ярайһы уҡ һөйкөмһөҙ кеше, беҙҙе ҡыуаныып ҡаршыламаны.* Д. Исламов. *Был .. егетте мин ял итергә килгәндең тәүге көндәренән үк беләм. Башҡа ул ниңәлер һөйкөмһөҙ күренде.* Р. Солтангәрәев.

● *Һөйгән һөйгәненә барыр, һөйкөмһөҙ кемгә барыр.* Мәҡәл. *Һөйкөмһөҙҙөң күрке юҡ, талымһыҙҙың таты юҡ.* Әйтем.

**ҺӨЙКӘЛЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **һөйкәү.**

**2.** *кар.* **һөйәнеү.**

● *Һөймәгәнгә һөйкәлмә.* Әйтем.

**ҺӨЙКӘЛЕШ** *и. грам.* Эш-хәлдең ысынбарлыҡҡа мөнәсәбәтен белдергән ҡылым категорияһы. *Хәбәр һөйкәлеше.*

**ҺӨЙКӘЛЕШЕҮ** *к.* Бер-береһенә терәлеү, һөйкәлеү. *Һөйкәлешеп ултырыу.* ■ *[Ун биш-егермеләп кеше] сисенмәй, иҙәндә бер-береһенә һөйкәләшеп ултыралар. Улар үҙ-ара ниҙер лыбырлашып .. алалар.* Һ. Дәүләтшина.

**ҺӨЙКӘНӘҮ** *к.* Ауыша биреп терәлеү; һөйәнеү. *Һөйкәнеп ултырыу.*

● *Ҡыу ағас йәш ағасҡа һөйкәнеп ҡырҡ йыл ғүмер иткән.* Мәҡәл.

**ҺӨЙКӘҮ** *к.* Ауыштыра биреп, үргә осон терәү; һөйәү. *Таяҡты һөйкәү. Һөйкәп ҡуйыу.* ■ *Гөлйөҙөм хәлһеҙ йылмайып, үҙенең һалҡын битен Айбулаттың эҫе сикәләренә һөйкәп, уға һыйынды.* Һ. Дәүләтшина. *Бабай башын һөйкәп ултырған таш ҡыймылдай башлаған* (Әкиәттән).

**ҺӨЙЛӘМ** *и. грам.* Бер бөтөн уй аңлатып грамматик һәм интонацион яҡтан ойошҡан һүҙ йәки һүҙбәйләнеше. *Ябай һөйләм. Ҡушма һөйләм. Теҙмә һөйләм.*

**ҺӨЙЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Һөйләүсенең һүҙенә ҡушылып уға һөйләргә ихтыяр ҡуйыу, ирек биреү. *Сәгиҙә сәй яһай-яһай, әбейҙе һаман һөйләндерергә, ҡылын тартып ҡарарға теләне.* М. Тажи. *Шәхми ҡарт бисәһен күп һөйләндереп торманы.* Т. Йәнәби.

**ҺӨЙЛӘНЕЛЕҮ** *к. кар.* **һөйләнеү** 1. *Бөгөн кисәлә күп һүҙ һөйләнелде.*

**ҺӨЙЛӘНЕҮ** *к.* **1.** *төш. кар.* **һөйләү** 1, 2. *Һөйләнгән һүҙ.* ■ *Халыҡ араһында телдән телгә күсеп, һөйләнеп, йырланып йөрөй торған тел әҙәбиәте .. бөтәһе берлектә фольклор тип атала.* Ғ. Амантай.

**2.** Берәүгә лә мөрәжәғәт итмәй, үҙ алдыңа һөйләү. *Һөйләнеп ултырыу.* ■ *Атайым ул йомошто атап ҡына ҡушмаҫ, тегене тегеләй, быны былай итергә ине, тигән булыр ҙа һөйләнер. Таяҡ башы кемгә тейгәнен үҙең төшөн шунда.* М. Кәрим.

**3.** Йоҡо аралаш һөйләшеү. *Һөйләнеп йоҡлау.*

**ҺӨЙЛӘНСЕК** *с.* Ризаһыҙлыҡ менән һөйләнеүсән. *Һөйләнсек әбей. Һөйләнсек булыу.*/ Күп һөйләүсән. *Һөйләнсек кеше. Һөйләнсек булыу.* ■ *Сәхип әбей бер ҙә һөйленсек кеүек түгел ине. Ә бөгөн ауыҙынан бер-бер артлы һүҙҙәр ҡойолоп ҡына тора.* С. Агиш. *Исмаһам, бынау минә алып килгән ҡарт та һөйләнсегерәк түгел бит, мыштым ғына тик ултыра.* Н. Мусин.

**ҺӨЙЛӘНСӘК** *с. кар.* **һөйләнсек.** *Сабир был юлы нисектер бик алсаҡ, һөйләнсәк булып китте. Ғәҙәтенсә был һөйләнсәклеге тағы шул Емеш менән булышыуҙан башланды.* З. Биишева.

**ҺӨЙЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **һөйләү.** *Атаһы менән оло ағаһы ни тиклем һөйләтергә тырышып ҡараһа ла Таҙ үҙенең төшөн һөйләмәне, ти* (Әкиәттән).

**ҺӨЙЛӘҮ** *к.* **1.** Уй, фекереңде телдән әйтеп бирә алыу. *Хәбәр һөйләү. Һүҙ һөйләү. Матур һөйләү. Һөйләп бөтөрөү.* ■ *Хасбулат олатай төтөнлөккә сыбыҡ-сабыҡ ырғыта-ырғыта, һалмаҡ, уйсан ғына тауыш менән һөйләп китте.* З. Биишева. *Их, нишләйем, телең юҡ шул һинең, һөйләй алмайһың һин, бурылым [атым].* Ғ. Сәләм. / Йыйылыш һ. б. урында нәмәләр тураһында хәбәр итеү, сығыш яһау. *Доклад һөйләү. Радио аша һөйләү.*

**2.** Ниндәйҙер бер хәл, ваҡиға тураһында телдән һүҙ алып барыу, хәбәр итеү. *Тарих һөйләү. Әкиәт һөйләү.* ■ *Беҙҙең бал Башҡортостанда ғына түгел, бөтә союзда маҡтала бит. Быны беләһеңдер?.. Ана шул данлы умартаһыҡта ҡарауылсымын мин тип һөйләй [Хасбулат олатай].* З. Биишева. / Нимәлер тураһында яҙма һ. б. мәғлүмәт биреү, иҫбатлау, күрһәтеү. *Һөйләп биреү.* ■ *Һыҙғырт ҡурай, үткән ҡайғыларҙы һөйлә йәмле Урал буйҙарын; һөйлә тарихыңдың, яуҙарыңдың, һөйлә ҡаналы башҡорт йолаһын.* Ш. Бабич./ Яттан уҡыу. *Шиғыр һөйләү.*

**3.** Кешенең етешле-етешһеҙ яҡтары тураһында кемгәлер телдән әйтеү, хәбәр, һүҙ таратыу. *Кешене һөйләү.* ■ *Беҙ булмаһаҡ, кемде һөйләргә белмәҫтер инде халыҡ* (Халыҡ йырынан). **Бушты** (*йәки* **юҡты**) **һөйләү** дөрөҫ булмаған хәбәрҙе, һүҙҙе таратыу; булмағанды һөйләү. *Юҡты һөйләп йөрөмә әле.*

◆ **һөйләһәң — һүҙ, төртһәң** — күҙ теләһәң теләмәһәң дә яманлап һөйләргә тура килгәнде белдергәндә әйтелә.

● *Кеше ышанмаҫ һүҙҙе ысын булһа ла һөйләмә.* Әйтем. *Күп белгән әҙ һөйләр.* Әйтем. *Уйламай һөйләгән, ауырымай үлгән.* Әйтем. *Уйнап һөйләһәң дә уйлап һөйлә.* Әйтем. *Һөйләй--һөйләй сәсән булырһың, йөрөй-йөрөй күсем булырһың.* Мәҡәл.

**ҺӨЙЛӘҮСЕ** *и.* Ниҙер һөйләгән кеше. *Доклад һөйләүсе. Телмәр һөйләүсе.* ■ *Ул [Солтанов] һөйләүсенең һүҙенә ҡушылмай, бер нисә тапҡыр урынынан ҡүтәрелде, ҡарышы өндәште.* Б. Бикбай./ Нимәлер тураһында матур итеп, тасуири рәүештә һөйләй белгән кеше. *Әкиәт һөйләүсе.* ■ *Халыҡ ижады әҫәрҙәрен яҙып алғанда .. төп талап — һөйләүсенең бер һүҙен дә .. боҙмай яҙып алыу.* Ғ. Амантай./ Нәфис һүҙ оҫтаһы. *Шиғыр һөйләүсе.*/ Кемделер ғәйепләп һөйләгән кеше. *Кеше һөйләүсе.* ■ *Һине һөймәҫ ир булмаҫ, юҡҡа илама, һылыу ҡыҙ; ҡалымһыҙ килгән килен, тип һөйләүсенән ҡурҡма, ҡыҙ* (Сеңләүҙән).

**ҺӨЙЛӘШ** *и. лингв.* Территориаль диалектың үҙенә генә хас үҙенсәлектәре менән билдәләнгән айырым бер төрө. *Көнсығыш диалекттың арғаяш һөйләше. Көньяҡ диалекттың дим һөйләше. Ерле һөйләш теле.* ■ *Күлдәргә һәм улар тирәһендә тупланған тормошҡа .. бәйле тыуған һүҙ байлығы халыҡтың һөйләш телендә һәм ижадында бик ныҡ сағыла.* К. Мәргән.

**ҺӨЙЛӘШЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **һөйләшеү**[1] 3. *Һөйләшелгән һүҙ буйынса. Күп һүҙ һөйләшелде.* ■ *Бала-сағаның хәлдәре .. бер нисәшәр һорашылды. Ике ауылдың хәленән хәбәрҙәр һөйләшелде.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҺӨЙЛӘШЕНЕҮ** *ҡ. диал.* Һөйләшелеү. *Правлениела һөйләшенәһе һүҙҙәр һөйләшенеп, йомоштар йомошланып бөткәс, Зәки урамға сыкты.* Ф. Лоҡман.

**ҺӨЙЛӘШЕҮ**[1] *ҡ.* **1.** *урт. ҡар.* **һөйләү** 2. *Әкиәт һөйләшеү.*

**2.** Тел ярҙамында уй-фекерҙе әйтеп аралашыу. *Йылмайып һөйләшеү.Ҡыҫҡырып һөйләшеү. Һөйләшеп ултырыу. Дуҫтарса һөйләшеү.*

**3.** Һүҙҙәр әйтә белеү, тел менән аңлатыу (балаға ҡарата). *Һөйләшә башлау. Һөйләшә белеү.* ■ *Һөйләшкән бер йәшендә Күсәк бала, әсәһенән яңы тыуған имсәк бала.* „Бабсаҡ менән Күсәк“./ Ниндәйҙер бер телде белеү, шул телдә аңлашыу. *Башҡортса һөйләшеү. Русса һөйләшеү.* ■ *Ғәмле ҡыҙ Ғәмилә, күҙ ҡарашҡайҙарың әҙәпсә, һөйләшеүкәйҙәрең гәрәпсә* (Халыҡ йырынан).

**4.** Ике яҡҡа ҡағылышлы мәсьәлә буйынса уртаҡ фекергә килер өсөн һүҙ алып барыу. *Һөйләшеп килешеү. Һөйләшеп эшләү.* ■ *[Мәғфирә иренә:] Булған аҡсаң һөйләшкәс, әллә мәһәренә етер ҙә һуң, түйына кәрәк.* Һ. Дәүләтшина. **Аяҡ терәп һөйләшеү** ҡурҡмай, үҙеңде ныҡ тотоп һөйләшеү. *Ярлы-ябаға Зариф бай кеүектәр менән аяҡ терәп һөйләшә башлаған ине.* И. Ғиззәтуллин.

**ҺӨЙЛӘШЕҮ**[2] *и.* Үҙ-ара уртаҡ фекергә килер өсөн алып барылған һүҙ. *Ике ил араһындағы һөйләшеү. Һөйләшеү алып барыу.*

**ҺӨЙЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **һөйләшеү**[1]. *Һалдаттар ҡыҫҡырып һөйләшә. Уларҙы һөйләштерге килмәй.* Д. Юлтый.

**ҺӨЙМӘЛЕК** *и.* Кешенең күңелдә тартып, яраттырып торған булмышы; һөйкөм.

**ҺӨЙМӘЛЕКЛЕ** *с.* Күңелгә ятышлы; һөйҙөргөс, һөйкөмлө. *Һөймәлекле бала. Һөймәлекле кеше. Һөймәлекле булыу.* ■ *Ҡуйыы ҡара ҡаштар, эре керпектәр, шәл аҫтынан маңлайына ҡыйпылып төшкән сәс уны [башҡорт ҡатынын] яҡты күңелле, һөймәлекле, мөләйем итеп тора.* Т. Килмөхәмәтов.

**ҺӨЙМӘЛЕКҺЕҘ** *с.* Күңелгә ятышһыҙ; һөйкөмһөҙ. *Һөймәлекһеҙ әҙәм. Һөймәлекһеҙ булыу.* ■ *[Егет] ауылдың һөймәлекһеҙ кешеһе булып киткән, .. кеше араһына ла керә алмаған.* Ә. Вахитов.

**ҺӨЙМӘН** *и.* Туңған ер, боҙ аҡтара торған ағас һаплы, осло тимер ҡорал. *Һөймән менән мәке уйыу.* ■ *Бер төркөм ҡатын-ҡыҙ ҡулдарына һөймән, көрәк алғандар ҙа тимерлек алдындағы ҡыш ҡарға күмелеп ҡалып ергә ҡатҡан һабандарҙы, тырмаларҙы урындарынан ҡуҙғатып, ҡороға сығарып йөрөйҙәр.* Й. Солтанов.

**ҺӨЙӨКЛӨ** *с.* **1.** Күңелгә яҡын булған, тоғролоҡ, яҡынлыҡ тойғоларын уятҡан; һөйгән. *Һөйөклө әсә. Һөйөклө балам. Һөйөклө илем.* ■ *Дошман шуны белһен: беҙ һуңғы тамсы ҡаныбыҙ ҡалғансы һөйөклө Ватанды яҡларбыҙ.* М. Тажи. / Күңелгә оҡшаған, ҡыҙыҡһыныу уятҡан. *Һөйөклө эш.*

**2.** Һөйөү хисе, яратыу, мөхәббәт уятҡан, һөйөлгән (икенсе енес кешеһенә ҡарата). *Һөйөклө ҡыҙ. Һөйөклө егет. Һөйөклө булыу.* ■ *[Ғамирҙың] һөйөклө Шәрифәһе бәпесләргә йөрөй. Малай көтәләр, малай!* Б. Бикбай. *Айбулат .. төйөнсөктө ҡутарҙы. ..Бына ул, һөйөклө Йөҙөкәйенең .. бүләге.* Һ. Дәүләтшина. / *эйл. ф.* **һөйөклөм** һөйгән, яратҡан кешегә әйтелә. *Күрһәң ине Ташкент иртәләрен һин алыҫ шул, алыҫ, һөйөклөм.* М. Кәрим.

**ҺӨЙӨЛӨҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **һөйөү**[1] 2. *Һөйҙөм, һөйөлдөм дә, бугай, улдар бүләк итте ҡатыным.* Р. Ғарипов.

**ҺӨЙӨНДӨРӨҮ** *к.* Һөйөнөс тойғоһо уятыу, ҡыуандырыу. *Матур йыр, саф тауыш .. күңелдә рәхәтлек уята. Ләкин был йыр Солтановты һис һөйөндөрмәне.* Б. Бикбай.

● *Дошманыңды һөйөндөрмә, дуҫыңды көйөндөрмә.* Әйтем.

**ҺӨЙӨНӨС** *и.* Һөйөнөү тойғоһо; ҡыуаныс, шатлыҡ. *Ҙур һөйөнөс. Һөйөнөс булыу. Һөйөнөс биреү. Һөйөнөс килтереү.* ■ *Сабый саҡтарҙың донъяны иң тәүҙә ауылдаштар тормошо, уларҙың һөйөнөстәре, көйөнөстәре аша аңлап үҫкәнмен.* Х. Назаров. *Дөрөҫ, ҡыҫҡа ғүмер эсендә мин аҙ күрҙем һөйөнөс.* Х. Ҡунаҡбай.

● *Бала һөйөнөс тә, көйөнөс тә.* Әйтем.

**ҺӨЙӨНӨСЛӨ** *с.* Һөйөндөрә торған, шатлыҡлы, ҡыуаныслы. *Һөйөнөслө хәбәр. Һөйөнөслө һүҙ. Һөйөнөслө булыу.* ■ *Бөтә донъя йәмле, һөйөнөслө йылы апрелдә ҡөтә.* Ш. Бабич.

**ҺӨЙӨНӨҮ** *к.* Күңелгә ризалыҡ, рәхәтлек биргән ҡыуаныслы тойғо кисереү; шатланыу. *Ныҡ һөйөнөү.* ■ *Барсынһылыуҙың бәхете өсөн бөтәһе лә һөйөндө, ти.* «Алпамыша».

● *Ир улһә, ил көйөнөр, дошман һөйөнөр.* Мәҡәл.

**ҺӨЙӨНӨШӨҮ** *к. урт. ҡар.* **һөйөнөү.** *Фирештәләр һөйөнөшөп, йырлап киттеләр осоп.* Ш. Бабич.

**ҺӨЙӨНСӨ** *и.* **1.** Шатлыҡлы яңылыҡты хәбәр итеү алдынан әйтелә торған һүҙ (яуап итеп бүләк бирелә). *[Хәтирә:] «Һөйөнсө, Айбикә еңгә! Ни бирәһең һөйөнсөһөнә, тиҙ бул»,— тине.* Һ. Дәүләтшина.— *Һөйөнсө, Маян! Һөйөнсө, Маян! .. Ҡуҙый ҙа күрпәс килә ятыр.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** Шуға яуап итеп бирелгән бүләк. *Һөйөнсө алыу. Һөйөнсө биреү. Һөйөнсө һорау.* ■ *Ҡарабай хан ялсыға башындағы ҡамсат бүркен һөйөнсөгә бирә.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

◆ **Һөйөнсөһөнә [бер] ҡолағы** һөйөнсө хәбәре алдан билдәле булғанда йәки бүләккә торошһоҙ булғанда шаяртып әйтелә.

**ҺӨЙӨНСӨЛӘҮ** *к.* Һөйөнсө хәбәрен еткереү. *Ҡарабай хандың ялсыһы сабып килеп етте лә, Ҡарабай ханға: «Һөйөнсө, ханым, солтаным, ҡыҙың бар!» — тип һөйөнсөләне.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҺӨЙӨТҺӨҘ** *с. диал.* Һөйкөмһөҙ, һөймәлекһеҙ.

**ҺӨЙӨҮ**[1] *к.* **1.** Тәрән яҡынлыҡ хисе тотоу, күнелгә яҡын күреү; яратыу. *Тыуған илде һөйөү.* ■ *Беҙ Ватандың ерен, һыуын, урмандарын һөйәбеҙ.* Б. Бикбай. *Яландарым, урманым, күккә ашҡан Уралым — минең изге төйәгем, һеҙҙе һөйә йөрәгем.* Салауат Юлаев. / Күңелгә ятыу, яҡын күреү. *Хеҙмәт һөйөү. Эш һөйөү.* ■ *Улар [бәхетле тигән кешеләр] нинә һуң былай? Эште яратып, уҙ эштәре итеп һөйөп эшләмәйҙәр.* С. Агиш. *Өйөр генә йылҡы араһында һөйөп менгән атым бүртә ине* (Халыҡ йырынан).

**2.** Икенсе енес кешеһен бөтә күнелдән яҡын күреү; яратыу; мөхәббәт тотоу. *Өҙөлөп һөйөү.* ■ *Мин ғүмеремдә былай һөйгәнем юк: уттар янды минең күҙемдә.* М. Хәй. *Һөйөп кенә йөрөгән егетендән, Ҡарасәскәй, тороп ҡалдыңмы* (Халыҡ йырынан).

**3.** Иркәләтеп, ҡосаҡлап, һыпап наҙлау. *Бала һөйөү. Һөйөп яратыу. Яратып һөйөү.* ■ *Ҡарт илап балаһын ҡосаҡланы, маңлайынан үпте лә бәләкәс балалар кеүек итеп арҡаһынан тапап һөйҙө.* Ғ. Дәүләтшин. *Йүгереп йөрөгән бәләкәс туғандарым берәм-берәм алып һөйәмен.* Ғ. Амантай.

◆ **Ене һөймәү** бик ныҡ яратмау; күрә алмау. *Енем һөймәй шул буржуйҙарҙы, бөтәһен бер юлы ҡыра һуғаһы ине!* Б. Бикбай.

● *Һөймәҫемде һөйәмен һөйәремдең хаҡы өсөн.* Әйтем. *Һөймәҫтең һөйәге һыймаҫ.* Әйтем. *Һүҙ һөймәгән — тирмән ҡорған.* Әйтем. *Һылыу һылыу күренмәҫ, һөйгән һылыу күренер.* Әйтем. *Эт йүгерерген төлкә һөймәҫ.* Әйтем.

**ҺӨЙӨҮ** [2] *и.* Икенсе енес кешеһенә булған тәрән яратыу хисе; мөхәббәт. *Һөйөү йылыһы. Һөйөү хисе. Һөйөү һағышы.* ■ *Иң юйылмаҫ эҙҙәр ҡалдырғаны — тәүге һөйөү, тәүге яратыу.* А. Игебаев. *Йән тетрәтеп килде ысын һөйөү. Килде, ләкин инде һуң ине.* Н. Нәжми.

**ҺӨЙӨҮСЕ** *и.* Нимәнелер яраҡкан, шуны күңеленә яҡын иткән, шуға иғтибар йүнәлткән кеше. *Йыр һөйөүсе. Китап һөйөүсе. Шиғыр һөөүсе. Эш һөйөүсе.* ■ *Былай ҙа ҡунаҡ һөйөүсе кешеләр Юлия кеүек ягымлы, ярҙамсыл ҡыҙҙы ысын күңелдән хөрмәтләйҙәр.* Һ. Дәүләтшина.

**ҺӨЙӨҮСӘН** *с.* Нимәнелер ныҡ яраҡкан, күңел биреп шөғөлләнгән. *Дан һөйөүсән. Эш һөйөүсән.* ■ *Шахматта отолоуҙан һис бер зарар килмәй. Әгәр үҙеңде һөйөүсәнерәк кеше булһаң, битең ҡыҙара, үҙеңде бер ни тиклем уңайһыҙ тоҭаһың.* Х. Мохтар.

**ҺӨЙӨҮСӘНЛЕК** *и.* Нимәнелер ныҡ яратыу сифаты, хәле. *Кеше һөйөүсәнлек. Ҡунаҡ һөйөүсәнлек. Эш һөйөүсәнлек.* ■ *Матурлыҡты, ирәбелекте Буранша эсәһенән, батырлыҡты, кеше һөйөүсәнлекте атаһынан алғайны шикелле.* З. Биишева.

**ҺӨЙӨШӨҮ** *к.* Бер-береңде яратыу, һөйөү. *Һөйөшөп йөрөү.* ■ *Минең ҡатын-ҡыҙҙарҙан дуҫтарым юк ине. Мин әле бер кем менән дә һөйөшмәгәйнем.* Н. Иҙелбай. *Туй яһарбыҙ көлөшөп, батыр менән ҡыҙыбыҙ ҙа ғүмер итер һөйөшөп.* М. Буранғолов.

**ҺӨЙРӘКЛӘТЕҮ** *к.* **1.** *йөкм. ҡар.* **һөйрәкләү.** *Кешенән һөйрәкләтеү.*

**2.** *ҡар.* **һөйрәкләү.** *Ҡыҙҙар ниндәй генә хәйлә ҡорһа ла, еңгәләре Фатиманы икеһе ике беләгенән тотоп, һөйрәкләтеп алып сығып китте.* Ж. Кейекбаев.

**ҺӨЙРӘКЛӘҮ** *к.* Тартҡылап, көслөк менән һөйрәү. *Оло аҡ һарыҡты көскә тотоп алдылар, һөйрәкләп ишек алдына алып сыҡтылар.* З. Биишева. *Яралыларҙы һөйрәкләп килтереп, санаға тейәй башланылар.* Б. Ишемғол.

**ҺӨЙРӘЛДЕРЕҮ** *к.* Нимәнелер ергә һәлберәтеп һөйрәү; һөйрәлтеү. *Итәкте һөйрәлдереп барыу.* ■ *Лесник Фәхри бүрегеи ҡырын һалындыра кейеп, итәк салғыйҙарын һөйрәлдереп .. волость йорто эргәләп төшөп килә.* Т. Хәйбуллин.

**ҺӨЙРӘЛЕҮ** *к.* **1.** Ергә тейеп һәлберәп йөрөү.

*һөйрәлеп килгән оҙон арҡан.* ■ *Күтәрелгән саҡта аждаһаның ҡойроғо ерҙән һөйрәлеп бара.* Д. Бураҡаев. *Шунда ла торған кейәүҙең салғый ғынаһы һөйрәлә* (Сеңләүҙән).

**2.** *күсм.* Аяҡты яй ғына ауыр итеп, саҡ ҡуҙғалып йөрөү. *Мәсет ҡарттары бер-бер артлы һөйрәлеп, баҫҡыстан үтә башланы.* И. Ғиззәтуллин.

**3.** *күсм.* Эштә, уҡыуҙа һ. б. бүтәндәрҙән артта ҡалыу. *Артта һөйрәлеү. Ҡойроҡта һөйрәлеү.* ■ *Мәктәп тормошо башланды .. мин артыҡ тырыш та булманым, артта ла һөйрәлмәнем.* З. Биишева.

**ҺӨЙРӘЛЕҮСЕ** *с.* **1.** Һөйрәлеп, шылып йөрөгән (йәнлектәргә ҡарата). *Өҫтәлгә йылдар уҙыу менән һарғайып, йылтырап, һөйәк төҫөнә ингән, әллә ниндәй фантастик һөйрәлеүсе йәнлектең башына оҡшатып эшләнгән ағас ижау сығып ятты.* З. Биишева.

2. **һөйрәлеүселәр** *и. мәғ. зоол.* Һөйрәлеп, шылып йөрөгән йылан, кеҫәртке, крокодил һымаҡ умыртҡалы йәнлектәр төркөмө.

**ҺӨЙРӘЛСЕК** *и. һөйл.* Күп йөрөүсән; аҙғын. *Һөйрәлсек ҡатын.*

**ҺӨЙРӘЛТЕҮ** *ҡ.* Ерҙә һәлберәтеп һөйрәү. *Сабыуҙы һөйрәлтеп барыу.* ■ *Уны [йылҡыны] ҡайырып сығарыу өсөн Алтынбай ҡаҙаҡ ҡороҡ һөйрәлтеп атҡа менә.* Т. Хәйбуллин.

**ҺӨЙРӘТЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **һөйрәтеү.** *Сумәлә арҡан менән һөйрәтелде.*

♦ **Һөйрәтелеп йөрөп эшләү** бөтә тырышлыҡ менән ихлас эшләү, әрһеҙ эшләү.

**ҺӨЙРӘТЕҮ** *ҡ. ҡар.* **һөйрәү** 1—4. *Арба һөйрәтеү.* ■ *Хәҙер һыуға төшөп батҡан тракторҙың алғы блогына ҡорос ҡанат ялғап, икенсе трактор менән һөйрәтергә генә ҡала.* Б. Бикбай. *Һунарсы йәнлектәрҙең ҡайныһын елкәһенә йөкмәп, .. ҡайныһын күтәреп, ҡайныһын һөйрәтеп ҡайтырға сыҡҡан, ти* (Әкиәттән).

**ҺӨЙРӘТКЕ** *и.* **1.** Йөк һөйрәтеү, һөргән ерҙе тигеҙләү һ. б. эш өсөн йәтешләнеп, ялбыр ботаҡлы ағастан йәки башҡа нәмәнән яһалған ябай ҡорал.

**2.** Үҙе йөрөй алмаған, башҡа берәр төрлө машинаға һ. б. тағып йөрөтөлә торған ҡорамал. *Һөйрәткеле трактор.* ■ *Танкыларҙың өсәүһе лә тимер һөйрәткe таҡҡан. .. Һөйрәткенең эсендә немецтарҙың һалдаттары һәм офицерҙары йәшенеп килә.* Ж. Кейекбаев.

**ҺӨЙРӘТМӘ** *и. ҡар.* **һөйрәтке.** *Бесән йыя ҡыҙҙар болонлоҡта, һөйрәтмәләр килә эркелеп.* Р. Ниғмәтуллин.

**ҺӨЙРӘҮ** *ҡ.* **1.** Нимәнелер тартып хәрәкәт иттереү, йөрөтөү. *Арба һөйрәү. Бесәнде һөйрәп ташыу. Һөйрәп сығарыу.* ■ *Ауылдың алама кейем бөркәнгән йәш балалары бәләкәй саналарын һөйрәп тауға сыҡты.* Ғ. Хәйри.

**2.** Ерҙән һ. б. урындан тотош күтәрмәй, бер яғынан тотоп тартыу. *Һөйрәп алып китеү. Һөйрәп сығарыу.* ■ *Мин .. таҡтаны һөйрәй башланым.* Д. Юлтый. *Йәйҙең оҙон айҙары көтөү артынан сыбыртҡы һөйрәп йөрөп үтте.* Һ. Дәүләтшина. / Көслөк менән тартҡылап, һөйрәкләп ҡайҙалыр алып барыу. *Һөйрәп килтереү. Һөйрәп төшөрөү.* ■ *Ҡоттары осҡан әсәйем менән һеңлемде һалдаттар баҙҙан һөйрәп сығарҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** Ҙур кейем кейеп һалындырып көскә йөрөү. *Оҙон бишмәт һөйрәү. Ҙур итек һөйрәү.*

**4.** *күсм.* Тормоштоң, хеҙмәттең һ. б. ауыр өлөшөн үтәү, башҡарыу. *Эште һөйрәү.* ■ *Ҡатындарға бар донъяны ҡалды һөйрәргә.* Н. Нәжми.

**5.** *һөйл.* Тартыу көсө менән үҙенә табан хәрәкәт иттереү; тартыу. *Болотто урман һөйрәй. Өй йылыһын ел һөйрәй.* ■ *Шаршы ҡыҙҙарҙы һыу төбөнә һөйрәп алып китмәксе.* З. Биишева.

♦ **Аяҡты саҡ һөйрәү** хәлһеҙ булып көскә йөрөү (ауырыу, йонсоу, ҡартайыу һ. б. арҡаһында). **Бауыр һөйрәү** *ҡар.* **бауыр. Эт һөйрәгер** ҡарғағанда әйтелә.

● *Эткә йомош ҡушһаң, һөйәк һөйрәп килтерер.* Мәҡәл.

**ҺӨЙҺӨН** *и. этн.* Туй мәһәренән тыш ҡыҙҙы оҙатып алырға килгәндә һыйлау өсөн кейәү килтергән мал. *Һөйһөнөнә һарыҡ биреү.*

♦ **Һөйһөн туйы** ҡыҙҙы оҙатып алырға килгәндә яһаған туй. *Кейәү ҡыҙҙы оҙатып алырға килгәндә бер баш мал алып килә һем шуны һуйып туйлай. Ошоно Арғаяшта һөйһөн туйы тиҙәр.* Т. Морат.

**ҺӨЙҺӨНӨҮ** *ҡ.* Күңелгә хуш күреү, яҡшы күреү, яратыу, хушһыныу. *Жандармдар итте бик һөйһөнөп ашаны, баллап сәй эсте.* Ж. Кейекбаев. *Рәсимә һуңғы көндәрҙә телһеҙ ҡыҙҙы һөйһөнмәй башланы.* Ғ. Вәлиев. *Был һаҙамыҡ, тонсоу урынды ҡоштар ҙа бик һөйһөнөп етмәй.* Ә. Вахитов.

**ҺӨЙӘК**[1] *и.* **1.** Умыртҡалы хайуандарҙың һәм кешенең һөлдәһен тәшкил иткән ҡаты өлөшө. *Кеше һөйәге. Мал һөйәге. Арҡа һөйәге. Бот һөйәге. Ҡоймос һөйәге. Умрау һөйәге. Янбаш һөйәге.* ■ *Кешеләр кояшҡа яныл ҡарайып, ябыҡлыҡтан сикә һөйәктәре сурайып сыҡҡан биттәрен алға һуҙып, үҙҙәренең сираттарын көтәләр.* Һ. Дәүләтшина. *[Һалдат:] Ранен булғайным. Шунда һөйәк араһында снаряд ярсыҡтары тороп ҡалғандар, ҡатыраҡ баҫһаң, шулар яфалайҙар, ауыrталар.* Д. Юлтый. *Биттәр сокорайып эскә батты, яңаҡ һөйәктәре беленде.* М. Ғафури. **Ҡалаҡ һөйәге** *анат.* арҡаның юғары өлөшөндәге өс мөйөшлө ике яҫы һөйәктең береһе. **Салыу һөйәге** малды һуйғанда салған урындағы муйын һөйәге. *Мал салған кешегә салыу һөйәген бирәләр.* / *с. мәғ.* Шул нәмәнән яһалған. *Һөйәк тараҡ.* ■ *Һөйәк һаплы, ике йәпле, асылмалы-ябылмалы бәке инде шул ярыҡҡа.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Ит түшкәһенең бер киҫәге. *Бер һөйәк ит. Һөйәк мөнйөү.* ■ *[Эткол] бәкеһен сығарып, .. алдына ҡуйған һөйәк итен япраҡлап турай һәм табаҡҡа һала.* Т. Хәйбуллин.— *Бик яҡшы ҡустым,— ти бай,— .. Бына һиңә һөйләшеү буйынса ике һөйәк ит. Көтөүсе был хәлгә аптырап ҡала* (Әкиәттән).

**3.** Кеше тәненең һәм уның төрлө өлөштәренең төҙөлөшө; буй-һын, кәүҙә. *Аҫыл һөйәк. Таһыл һөйәк. Эре һөйәкле.* ■ *Рәүфә эрерәк һөйәкле булғанға үҙ тиҫтерҙәренә ҡарағанда еткәнерәк күренә.* Ә. Вәли. *[Ҡотлобай:] «Был кем кәләше икән? Һай, һай, аҫыл һөйәк, һылыу ҡатын» тип һоҡланды [Гөлйөҙөмгә].* Һ. Дәүләтшина. *[Ҡыҙ*

*атаһына:] Алтмыш йәшлек картка бирҙең һөйәгем хурланһын тейеп* (Сеңләүҙән).

**4.** Үлгән кешенең кәүҙәһе; мәйет. *Ябырылып яу килгәндең һөйәге калган Урал тау, айбарлаған батырҙарҙың төйәге булган Урал тау* (Ҡобайырҙан). *Ерен-һыуын һаклап корбан булган, шунда [Урал тауында] ята батырҙар һөйәге* (Халыҡ йырынан).

◆ **Аҡ һөйәк** 1) борон заманда юғары ҡатлам вәкиленә ҡарата әйтелгән. *Ҡаны боҙоҡ дошманды аҡ һөйәк тип таныныҡ* (Ҡобайырҙан); 2) ҡара эш эшләргә яратмаған кеше тураһында әйтелә. *Аҡ һөйәк булыу.* **Бай һөйәге** өмәселәргә өйгә алып ҡайтыу өсөн бирелә торған ҙур бер һөйәк ит. **Еңел һөйәкле** етеҙ хәрәкәтле, тиҙ ҡуҙғалыусан, егәрле. *Еңел һөйәкле инең һин, хәҙер кара: окшап калдың куҙгата алмаç умартага.* М. Илбаев. **Ҡаҡ** (*йәки* **ҡоро**) **һөйәккә ҡалыу** бик ныҡ ябығыу. *[Гөлнур:] Гел илаулап, үҙеңде үҙең ашап йөрөһәң, һурылыу түгел, как һөйәккә калырһың әле.* Б. Бикбай. **Телдең һөйәге юҡ** *йәки* **тел һөйәкһеҙ** килешкән-килешмәгәнде һөйләгән кешегә ҡарата әйтелә. *[Әхнәф:] Һүҙ шаяртырга теләһәң, ихтыярың. Тел һөйәкһеҙ.* С. Кулибай. **Тере һөйәк** иҫән-һау (кешегә ҡарата, мәйет түгел тигән мәғәнәлә әйтелә). *Әйҙәгеҙ, өй бәләкәй тип тормагыҙ, инегеҙ. Тере һөйәккә урын табыла, тиҙәр, һыйырбыҙ әле.* Н. Мусин. **Үҙ һөйәгем** үҙемдең нәҫел-нәсәбем, үҙ туғаным, үҙ ҡаным тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Ишмырҙа:] Алдан өсөнсөһө әллә агайым инде. [Тәңкәбикә:] Юк, ул түгел. Үҙ һөйәгемде үҙем таныр инем.* М. Кәрим. **һөйкөм һөйәге** *кар.* **һөйкөм. Һөйәге ҡуҙғалыу** боронғо хөрәфәт буйынса: үлгән кешене насарларға ярамай тигән мәғәнәлә ҡулланыла. *Боронголар үлгән кешене яманлап һөйләһәң, һөйәге куҙгала, йәне рәнйей, имеш, тиҙәр.* Һ. Дәүләтшина. **Һөйәккә үтеү** ныҡ өшөтөү.

● *Аҫыл һөйәк ҙур булмаç.* Мәҡәл. *Ата-әсә алтын һөйәк.* Мәҡәл. *Йылы һөйәк һындырмай.* Әйтем. *Дуңгыҙҙан бер кыл, байҙан бер һөйәк.* Әйтем. *Таяк иттән үтә, һүҙ һөйәктән үтә.* Мәҡәл. *Һөйәк сәйнәп май сыкмай.* Әйтем. *Һөйәр кеше һөйәгенән билдәле.* Әйтем. *Үҙ һөйәгең үҙеңә ауыр түгел.* Әйтем. *Үҙ һөйәгем үҙемә якын.* Әйтем. *Эт күңеле бер һөйәк.* Әйтем. *Эткә һөйәк ташлаһаң, шыңшымаç.* Әйтем.

**ҺӨЙӘК** [2] *и.* Емештең эсендәге ҡаты көплө орлоҡ. *Муйыл һөйәге. Сейә һөйәге. Өрөк һөйәге.*

**ҺӨЙӘКЛӘҮ** *ҡ.* Һөйәге менән өләшләү; итте һөйәге менән бергә итеү. *Һөйәкләп ит ашап, урындыкта түгәрәлеп ултырып тороп һурпа эскәс, Зөлхизә әбей йомош тапкан кеше булып, тышка сыгып китте лә кабат әйләнеп инмәне.* Н. Мусин.

**ҺӨЙӘК-ҺАЯҠ** *и. йыйн.* Төрлө һөйәктәр. *Ашай торгас, ашъяулыкта һөйәк-һаяк кына тороп калды.* З. Биишева.

**ҺӨЙӘЛ** *и. диал.* Сөйәл. *Кулга һөйәл сыгыу.*

**ҺӨЙӘЛЕҮ** *ҡ. төш. кар.* **һөйәү.** *Сумәләлә теше һынган тырма, сук сауылга салгы һөйәлгән.* М. Хәй.

**ҺӨЙӘЛЛӘНЕҮ** *ҡ. диал.* Сөйәлләнеү.

**ҺӨЙӘМ** *и.* Кирелгән баш бармаҡ менән һуҡ бармаҡ остары араһына тиң булған боронғо үлсәү берәмеге. *Ул [крәҫтиән] касандыр аршынды ла белмәй, карыш һәм һөйәм менән, аҙым менән үлсәй ине.* С. Агиш. **Һыныҡ һөйәм** кирелгән баш бармаҡ менән бөгөүле һуҡ бармаҡ остары араһына тиң булған боронғо үлсәү оерәмеге.

● *Карыштан һөйәм якын.* Мәҡәл.

**ҺӨЙӘМЛӘҮ** *ҡ.* Һөйәмгә һалыу. *Һөйәмләп үлсәү.*

**ҺӨЙӘМӘ** *и.* Урманда әҙерләп, һөйәп өйөлгән утын.

**ҺӨЙӘН** *и.* Ҡабығы һыҙырылған йыуан йүкә ағасы. *Һөйәндән яһау. Һөйән агас. Һөйән бүрәнә.* ■ *Гариф һөйән бүрәнәләрҙән һалынган йорттоң эсенә ингәндә .. йырлайҙар ине.* Ғ. Хәйри. *Өйҙөң ишектәре аҡ шыршынан, тәҙрә рамдары һөйән агасынан эшләнде.* Ә. Бикчәнтәев.

**ҺӨЙӘНГЕС** *и. һөйл.* Ултырғыс һымаҡ нәмәләрҙең арҡа терәп ултыра торған урыны, арты. *Ултыргыс һөйәнгесе. Дивандың һөйәнгесе.*

**ҺӨЙӘНДЕРЕҮ** *ҡ. йөкм. кар.* **һөйәнеү.** *Ҡоймага һөйәндереп куйыу.*

**ҺӨЙӘНЕҮ** *ҡ.* Аушая, ҡыйшая биреп, нимәгәлер терәлеү; һөйкәлеү (кәүҙә, ағас һымаҡ баҫып торған нәмәләргә ҡарата). *Агаска һөйәнеү. Һөйәнеп тороу. Һөйәнеп ултырыу.* ■ *Ҡуш карагайҙың берeһе йәҙрә ярылыуҙан шарт һына, ләкин ул ергә аумай, һау карагайга һөйәнеп баҫкан килеш кала.* К. Әхмәтйәнов.

● *Йәш агаска һөйәнеп, кыу агас кырк йыл гүмер иткән.* Мәҡәл.

**ҺӨЙӘР** *и.* **1.** Яратҡан, һөйгән кеше.

**2.** Берәй ҡатын менән никахһыҙ бәйләнештә булған ир (шул ҡатынға ҡарата). *Һөйәр булыу.*

● *Һөймәҫемде һөйәмен һөйәремдең хакы өсөн.* Мәҡәл.

**ҺӨЙӘРКӘ** *и.* Берәй ир менән никахһыҙ бәйләнештә булған ҡатын (шул иргә ҡарата). *Һөйәркә булыу. Һөйәркә тотоу.* ■ *[Гөлъямал Нигмәтуллагa:] Астан үлеп барганда ла һиңә һөйәркә булмаясакмын.* Я. Хамматов. *Һылыу баярҙың һөйәркәһе булыуҙан баш тарткас, баяр уны каты һуктырган.* Ғ. Ғүмәр.

**ҺӨЙӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. кар.* **һөйәү.** *Ҡойманы һөйәтеп куйыу. Һөйәтеп яһау.* ■ *[Әхмәт:] Эш эшләнем, түктем тиремде, мин уйланым таяу табырмын тип, һөйәтергә емерек өйөмдө.* Ғ. Сәләм.

**ҺӨЙӘҮ** *ҡ.* Ауыш йәки текә баҫтырып, үрге яғын нимәгәләр терәү. *Агасты һөйәп куйыу. Ҡоймага һөйәү.* ■ *Сыуалдың утын һөйәп куя торган урынынан йырмаклап, тамсы йылгалары ага.* Т. Йәнәби. *Ул [Сәгиҙә] саңгыларҙы коймага һөйәп куйҙы..* М. Тажи.

**ҺӨЙӘҮЛЕ** *с.* Һөйәп ҡуйылған. *Һөйәүле такталар. Һөйәүле тороу.* ■ *Барый мөйөштә һөйәүле торган һәнәк менән көрәкте алып, курага сыкты.* Р. Ғабдрахманов.

**ҺӨЙӘШЕҮ** *ҡ. урт. кар.* **һөйәү.** *Ҡойма буйына такта һөйәшеү.*

**ҺӨЛ** *ымл.* Ниндәйҙер эште ҡапыл башлау өсөн күмәк кешене саҡырып, өндәп әйтелә. *«Ну, малайҙар, хәҙер команда бирәм. «Бер, ике, өс, һөл!» тигәс тә, теҙгендәрегеҙҙе ебәрерһегеҙ»,— тине милиционер.* С. Агиш.

**ҺӨЛГӨ** *и.* Ике башы ҡыҙыл кизе менән сигеп эшләигән оҙон киндер таҫтамал; сөлгө. *Һөлгө башы.* ■ *Алыҫта, офоҡ һыҙығында сигелгән бәйге һөлгөләре шикелле ҡыҙғылт һары болоттар хәрәкәтһеҙ аҫылынып тора.* З. Биишева. *Килен төшә. .. Тәү башлап саҡырған һәр бер өйгә килен һөлгө элеп инә.* Н. Бикбулатов.

**ҺӨЛГӨБАШ** *и.* Һөлгөнөң сигелгән башы.

**ҺӨЛДӘ** *и.* **1.** Кеше һәм йәнлектәр тәненең тотоноп тороуын тәшкил иткән һөйәктәр берекмәһе. *Кеше һөлдәһе. Балыҡ һөлдәһе.* / *һөйл.* Бик ныҡ ябыҡ (кеше йәки хайуандарға ҡарата). *Үткән ҡыш ҡарҙың ҡалын булыуы сәбәпле йылҡы тибендән һөлдәһен генә алып сыҡты.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *күсм.* Төҙөлә, ҡорола торған нәмәнең төп нигеҙен тәшкил иткән төп ҡоролма. *Беҙҙең күҙ алдында буласаҡ өйҙөң, үҙенә күрә һөлдәһен ҡороп ҡуйҙы.* Д. Исламов.

**ҺӨЛДӘР** *и. диал. кар.* һөлдә **1.** *[Хужа ҡатын:] Айһылыуҙы күреп, иҫән-һаулыҡ ҡына һорашҡым, хәлен һораша алманым, үҙе бик ябыҡ, ҡоро һөлдәре генә ҡалған, тигән* (Әкиәттән).

**ҺӨЛӨК** *и.* Хайуандар тәненә йәбешеп ҡанын һура торған һыу йәнлеге. *Һөлөк һалыу.* ■ *Ас һөлөктәр баштарын кәкәнләтеп, тәнгә йәбешәләр ҙә ҡан һура башлайҙар.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡара һөлөк** ҡыҙғылт төҫтәге медицинала ҡулланылмай торған һөлөк.

◆ **Һөлөк кеүек** *йәки* **һыу һөлөгө [кеүек], һыу һөлөгөндәй** 1) ҡупшы кәүҙәле, зифа буйлы. *Алтмыш ике кеше комиссия үтеп, һыу һөлөгө кеүек алтмыш егет ил һағына баҫтыҡ.* И. Ғиззәтуллин. *Кинйәгә Тәнзиләне йәрәшергә кәрәк .. төҫ-һыны ҡайһылай: һыу һөлөгө бит!* С. Кулибай; 2) тиреһе һөлөк һымаҡ ялтырап торған шәп, көр (йылҡы малына ҡарата әйтелә). *Һыу һөлөгөндәй һимеҙ аттар .. тигеҙ ерҙә лобогрейканы осортоп ҡына алып баралар.* Ғ. Дәүләтшин. **Һөлөк һалыу** дауалау маҡсатында һөлөк тө, тәнгә ҡуйып ҡанды һурҙырыу. *[Барсын әбей:] — Юҡ, Сәгиҙә, бөгөн шишәмбе көн һөлөк һалыуҙың бер файҙаһы ла булмай ул. Иртән шаршамбы көн һәйбәтләп тороп һалырбыҙ.* Һ. Дәүләтшина.

● *Аптыраған һөлөк агас тешләр.* Әйтем.

**ҺӨЛӨКСӨ** *и. һөйл.* Һөлөк һалып дауалаусы.

**ҺӨЛӘЙ** *и. диал.* Һондор. *Һөләй кеше.*

**ҺӨЛӘЙМӘН** *и.* **1.** Һөмбаштар ғаиләһенә ҡараған ҡыҙғылт итле диңгеҙ балығы; һөмбаш.

**2.** *иҫк. кар.* **кит** [1].

**ҺӨЛӘЙТ** *ҡыу.* Ниндәйҙер бер эш, хәлдә кешене дәртләндереп ебәреү йәки ҡасып барған йәнлекте ныҕыраҡ өркөтөү өсөн әйтелә.

**ҺӨЛӘЙТЛӘҮ** *к.* Һөләйт, тип ҡысҡырыу. *Ҡуяндың артынан һөләйтләп ҡалыу.* ■ *Тиҙерәк, йәһәтерәк йөҙ, Бураншаl.. Күп ҡалманы йөҙөргә! .. — тип һөләйтләгән Ирйегет.* З. Биишева.

**ҺӨЛӘМӘ** [*рус.* сулема] *и. кар.* **сулема.**

**ҺӨМБАШ** *и.* **1.** Һөмбаштар ғаиләһенә ҡараған ҡыҙғылт итле диңгеҙ балығы. *Һөмбаш ыуылдырығы.* **Аҫыл һөмбаш** һарғылт ҡыҙыл итле диңгеҙ балығы.

**2.** *диал.* Ташбаш.

**3. Һөмбаштар, һөмбаш балыҡтар** *зоол.* Сөсө һәм тоҙло һыуҙарҙа йәшәй торған аулау балыҡтары ғаиләһе.

**ҺӨМӨР** *и. кар.* **һөмһөр. Һөмөрө ҡойолоу** (*йәки* **ҡасыу**) кәйефһеҙләнеүҙән төҫ үҙгәреү, сырай йәмһеҙгә әйләнеү. *Һөмөрө ҡойолоп ултырыу.* ■ *Ул [Ғилман] ғәҙәттәге йор һүҙлелеген онотоп, гел һөмөрө ҡойолоп йөрөй торған бер кешегә әйләнеп китте.* Б. Бикбай. *[Хөснөлхаҡ — Закирға:] Һин хатта әҙәм төҫлө ҡыуана ла, көлә лә белмәйһең, һөмөрөңдө ҡойоп, ҡашыңды төйөп тик тораһың.* З. Биишева.

**ҺӨМӨРҺӨҘ** *с.* Ҡаранғы сырайлы; сырайһыҙ; һөмһөҙ. *Һөмөрһөҙ кеше. Һөмөрһөҙ булыу.*

**ҺӨМРАҺ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Юлдаш. *Был дәм һөмраһ улдым һиңә, сәй-ҡаймағың ҡани?* (Бәйеттән).

**ҺӨМРӘЙЕҮ** *к.* Сырай, төҫ боҙолоу. *Әхмүш уҙ ҡыҙының һүҙҙәрен йүнләп ишетмәне лә, аңламаны ла, башын баҫып, һөмрәйеп килә бирҙе.* Б. Бикбай.

**ҺӨМТОЙМАҪ** *с. диал.* Һөмһөҙ.

**ҺӘМҺӨҘ** *с.* **1.** Күрер күҙгә йәмһеҙ; һөйкөмһөҙ. *Һөмһөҙ булыу.* ■ *Боғазы һалынып төшкән, һимеҙ елкәле, сиртһәң ҡаны сығырға торған, тарҗыҡ танаулы һөмһөҙ бер бәндә [Талха].* Ж. Кейекбаев.

**2.** Оялыуҙы, тартыныуҙы белмәгән; әрһеҙ, оятһыҙ. *Һөмһөҙ булыу. Һөмһөҙ рәүештә.* ■ *[Кәмилә:] Атаҡ, бигерәк һөмһөҙ, сырайын һытып, яңаҡтарын сәйнәп ни һөйләй.* М. Ғафури. *Килен, сибәр улым. Ғәмһеҙ булма, һаҡла һөмһөҙ, яман күҙҙәрҙән.* Ҡ. Даян.

● *Һөмһөҙ һаҡлағанды ҡуймаҫ, ҡарға ҡаҡлағанды ҡуймаҫ.* Мәҡәл.

**ҺӨМҺӨҘЛӨК** *и.* Оятһыҙлыҡ, әрһеҙлек. *Һөмһөҙлөгө көслә. Һөмһөҙлөгө менән шулай ҡылана.*

**ҺӨМҺӨҘЛӘНЕҮ** *к.* Оятһыҙ, тартыныуһыҙ ҡыланыу, һөмһөҙ булыу. *Һөмһөҙләнеп китеү. Һөмһөҙләнеп йөрөү.* ■ *Хәбибуллиндың торған һайын тупаҫланып, һөмһөҙләнә барыуы, төптө юҡ һүҙҙәр һөйләүе Маһираны аптырашта ҡалдырҙы.* Х. Ғиләжев.

**ҺӨМҺӨК** *и. диал.* Аҫтыртын. *Уның һөмһөк икәнен кем белмәй.*

**ҺӨМҺӨР** *и.* Кеше йөҙөнөң төҫө, сырайы. *Һөмһөрө юҡ.* **Һөмһөрө ҡойолоу** (*йәки* **ҡасыу**) кәйефһеҙләиеп төҫ үҙгәреү, сырай йәмһеҙләнеү. *Һыу уртлаған кеше һымаҡ һөмһөрөн ҡойоп торған Ғәйзулла түҙмәне, илар хәлгә етте.* Я. Хамматов. *Ҡотдос килеп инде.— Бәй, Сурагол ағай, һин ҡайттыңмы ни? Нигә улай һөмһөрөң ҡойолоп ултыра. Әллә ауырыйһыңмы?* Т. Хәйбуллин.

**ҺӨМҺӨРӘҮ** *к.* Кәйефһеҙләнеүҙән төҫ, сырай боҙолоу. *Һөмһөрәп йөрөү.* ■ *Аш эргәһендә ҡыҙҙарҙың береһе лә ҡысҡырмай, көлмәй. Һәр ҡайһыныһы һөмһөрәгән, хәлдән тайған, теләр-теләмәҫ кенә ҡалаҡ күтәрә.* А. Таһиров.

**ҺӨНӘР** [*фарс.*] *и.* **1.** Билдәле бер эш, шөғөл өлкәһе. *Яҡшы һөнәр. Һөнәргә өйрәнеү. Һөнәр белеү.* ■ *[Ҡотлобай:] Көтөү эше — бик йыуаныс, файҙаһыҙ бер һөнәр ул.* Һ. Дәүләтшина. *Минең атайымдың төп һөнәре тауҙан сажинлап таш сығарыу һәм таш нигеҙҙәр, таш келәттәр һалыу ине.* Т. Йәнәби. / Нимәнелер эшләй белеү оҫта-

лығы, һәләте (хайуандарға ҡарата). *Ошо көндәрҙә миңә яңы ат бирҙеләр. Коновод .. уның һөнәрҙәрен күрһәтте. Ҡыҙыҡ инде: «ят!» тиһәң, ята, «тор» тиһәң, тора.* С. Әлибаев. *Була матур һалпы ҡолаҡ — ситтер тоҡомло эттәр, һөнәрҙәре: ауға йөрөү, өйрәк тотоу кеүектәр.* Ғ. Амантай. / Билдәле бер оҫталыҡ, махсус күнекмә талап иткән эш, хеҙмәт. *Ярлы-ябағаның бер өлөшө байҙарға батраклыҡ итһә, шаҡтай ҙур өлөшө һөнәр менән көн күрә: ике-өс кеше ҡушылып такта яра, дегет ҡайната, һалабаш һала, күнәк, тәпән яһай, септе, ҡап һуға.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Билдәле бер нәмәгә булған тәбиғи һәләт, талант. *Йырсы һөнәре. Һөнәр күрһәтеү.* ■ *Беҙ йырланыҡ та, бейенек тә, һөнәр һорап күршегә инмәнек.* И. Абдуллин. *Ҡыҙҙар артынан егеттәр, егеттәр артынан тағы ҡыҙҙар берәм-берәм түңәрәккә сығып үҙ һөнәрҙәрен күрһәтте.* К. Мәргән.

● *Ата һөнәре балаға мираҫ.* Әйтем. *Бармағыңа аң килһә, һөнәреңә дан килер.* Әйтем. *Ир һөнәре эш булыр.* Мәҡәл. *Өйрәнә белеү — үҙе бер һөнәр.* Әйтем. *Һөнәре бар өҫкә йөҙәр.* Мәҡәл. *Һөнәре бар хур булмаҫ.* Әйтем. *Һәүәҫкәр һөнәр арттырыр.* Әйтем.

**ҺӨНӘРЛЕ** *с.* Ниндәй ҙә булһа бер һөнәргә эйә булған, һөнәре булған. *Һөнәрле кеше. Һөнәрле булыу. Һөнәрле итеү.* ■ *Булған уның өс улы, .. өсөһө лә һөнәрле: береһе булған тимерсе, береһе булған балтасы, береһе булған күмерсе.* С. Ҡудаш. *[Сынбулатов:] Мин уларҙың бейеүҙәрен дә, йырҙарын да ишеттем. Йәштәрегеҙ бик һөнәрлеләр икән.* М. Тажи. *Һөнәрленең ҡулы алтын тиҙәр, ҡурҡа тиҙәр унан һәр бер эш.* Ҡ. Даян.

● *Һөнәрле кеше — ҡораллы кеше.* Әйтем. *Һөнәрле кеше үлмәҫ, һөнәрһеҙ кеше көн күрмәҫ.* Мәҡәл. *Һөнәр — һөнәрле ҡулында ғына һөнәр, һөнәрһеҙ ҡулында тумәр.* Әйтем.

**ҺӨНӘРМӘН** *и.* Һөнәр эйәһе, һөнәрле кеше. *Тау һелкетеп бейей егеттәр, .. әле көрәшселәр алыша, әле һөнәрмәндәр ярыша.* С. Кулибай.

**ҺӨНӘРСЕ** *и.* **1.** Үҙенә башҡа күнекмә, оҫталыҡ талап иткән бер эш менән шөғөлләнгән кеше. *Һөнәрсе булыу.* ■ *[Һөнәрсе уға:] Мин иҫән саҡҡа белеп ҡал,— тип күпме ялынған.— Ә ул — өйрәнсек — һаман тәкәбберләнеп көлгән.* З. Биишева.

**2.** *һөйл.* Һөнәрселек мәктәбе уҡыусыһы.

● *Сәсәндең һүҙе уртаҡ, һөнәрсенең ҡулы уртаҡ.* Әйтем.

**ҺӨНӘРСЕЛЕК** *и.* Айырым күнекмә, оҫталыҡ талап иткән төрлө эш өлкәһе. **Һөнәрселек мәктәбе** төрлө һөнәргә өйрәтә торған мәктәп.

**ҺӨНӘР-ҮНӘР** *и. йыйн.* Төрлө һөнәр *Йәш елкенсәк нисек итеп бил быуғанын айкап-байкап тора күпте күргән ҡарттар. Һөнәр-үнәр шул ҡарттарҙан ҡала беҙгә ҡалған һымаҡ ерҙә изге аманаттар.* М. Илбаев.

**ҺӨНӘРҺЕҘ** *с.* **1.** Һөнәре булмаған, һөнәргә эйә булмаған. *Һөнәре бар күрһәтә үҙ һөнәрен, һөнәрһеҙҙәр күрһәтәләр үҙҙәрен.* М. Кәрим.

**2.** *күсм.* Эш мәнеһе белмәгән, булдыҡһыҙ.

● *Һөнәрһеҙ ир — ҡанатһыҙ ҡош.* Мәҡәл. *Һөнәрһеҙ тырышты күрә алмаҫ, эшләп оҙаҡ түҙә алмаҫ.* Мәҡәл.

**ҺӨҢГӨ** *и.* Тимер осло, оҙон һаплы бороңғо яу ҡоралы. *Һөңгө менән сәнсеү.* ■ *Өс көн, өс төн ҡаты дау бара, саң болото күктә сөм ҡара. Ҡанга батып ҡыҙҙы һөңгөләр, йылга ҡандар ергә һеңделәр.* М. Кәрим.

**ҺӨПӨСӨК** *ымл.* Йәш баланы һикерткәндә таҡмаҡлап әйтелә.

**ҺӨПӨСӨКЛӘҮ** *к.* **1.** Йәш баланы һамаҡлап һикертеү.

**2.** *күсм.* Баланы саманан тыш иркәләтеү.

**ҺӨР** *с.* Көҙҙән яҙға тиклем елдә ҡаҡланған, ҡаҡ (иткә ҡарата).

**ҺӨРГӨ** *и.* **1.** Ағасты һөжөрөп таҙарта торған ҡорал.

**2.** *диал.* Ирәк.

**ҺӨРГӨН** *и.* Ғәйепләнгән кешене алыҫ төпкөлгә ебәреү язаһы һәм шул язаны үткәргән урын. *Һөргөнгә ебәреү. Һөргөндә булыу. Һөргөндән ҡайтыу.* ■ *Ҡулдарына ауыр быгау тагып, ҡаһармандар килгән һөргөнгә.* М. Хәй. *Буранбай ҙа һөргөн китеү менән баҫылыр микән илдең ирҙәре* (Халыҡ йырынан).

**ҺӨРГӨНСӨ** *и.* Һөргөндәге кеше. *Каторжандар быгау тагып үткән, күп һөргөнсө бында күмелгән.* М. Хәй.

**ҺӨРГӨС** *и.* **1.** *һөйл.* Ниҙе лә булһа ышырып өйә торған ҡорамал. *Механизаторҙар күберәк дым каплап ҡалыу өсөн көрәшәләр. Хәҙер баҫыуҙарҙа ҡар һөргөс таҡҡан тракторҙар йөрөй.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 7 март.

**2.** *диал.* Ирәк.

**ҺӨРГӨСЛӘҮ** *к.* Һөргөс менән ышырып өйөү. *Ҡарҙы һөргөсләү.*

**ҺӨРҘӨРӨҮ** *к.* **1.** *йөкм. ҡар.* **һөрөү**[1]. *Ерҙе һөҙҙөрөү.*

**2.** Ныҡ итеп ышырыу. *Кәмә мороно тулҡын ыңғайына ком һөрҙөрөп һөҙәк ярға килеп ҡаҙалды.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҺӨРКӘ** *и.* Ҡуңыр төҫтәге мал.

**ҺӨРЛӨГӨҮ** *к.* **1.** Барған ерҙән нимәгәләр эләгеп йығыла яҙып ҡалыу; абыныу. *Һөрлөгөп йығылыу.* ■ *Күк толпар һөрлөгөп китеп, Маянһылыу осоп төшөп ҡалған.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** *күсм.* Тормошта, эштә хаталаныу. *[Кунаҡкол:] Ҡара, ҡыҙыҡай, .. минең авторитет менән шаярма, һөрлөгөрһөң.* Х. Ғиләжев.

● *Кеше түгел дүрт аяклы ат та һөрлөгә.* Мәҡәл.

**ҺӨРЛӨГӨШӨҮ** *к.* **1.** *урт. ҡар.* **һөрлөгөү** 1.

**2.** *күсм.* Өйкөлөшөп, бер-береңә тейеп бергә ашығыу. *Һөрлөгөшөп килеп сығыу.* ■ *Тай-тулаҡтар йылҡылдашып, һөрлөгөшөп, тауҙан тауға сабып йөрөр ине.* Н. Мусин.

**ҺӨРЛӨКТӨРӨҮ** *к.* Эләктереп йыға яҙыу. *Һөрлөктөрөп ебәреү. Һөрлөктөрөп алып барыу. Һөрлөктөрөп йығыу.*

**ҺӨРМӘ** [*фарс.*] *и.* **1.** Химик элемент; мурт аҡ металл (техникала, медицинала ҡулланыла).

**2.** Ҡаш-керпекте ҡарайта торған буяу. *Ҡашың ҡара, ҡашың ҡара, һөрмә тартҡанһың буғай* (Халыҡ йырынан).

**ҺӨРМӘКЛӘТЕҮ** *к.* Эләктереп, тартҡылап һөйрәү; һөйрәкләү. *Таймас килеп сығып, .. еңгәң менән икебеҙҙе һөрмәкләтеп алып барып, алга уҡ ултыртып ҡуйҙы.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҺӨРМӘКЛӘҮ** *к.* Һөрлөгә-һөрлөгә йүгереү. *Һөрмәкләп барып колап китеү.*

**ҺӨРМӘЛЕ: һөрмәле күҙ** керпек төбө һөрмә тартҡан һымаҡ ҡарайып торған матур күҙ. *Беҙҙең колхоз кыҙҙары, кара кашлы, бөҙрә сәсле, һөрмәле күҙҙәре.* С. Ҡудаш.

**ҺӨРМӘЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **һөрмәләү.** *Һөрмәләнгән күҙ.*

**ҺӨРМӘЛӘҮ** *к.* Һөрмә (2 мәғ.) тартыу. *Күҙҙе һөрмәләү.*

**ҺӨРӨЛӨҮ** [1] *к. төш. кар.* **һөрөү** [1] 1. *Туңға һөрөлгән ер.* ■ *Көҙгө һабан һөрөлөп, арыш сәселгән.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҺӨРӨЛӨҮ** [2] *к. төш. кар.* **һөрөү** [2]. *Илдән һөрөлөү. Себергә һөрөлөү.*

**ҺӨРӨМ** [1] *и.* **1.** Коромло ҡара төтөн. *Ҡара һөрөм. Һөрөм еҫе.* ■ *Ҡыуыҡһыҙ янған бишле лампаның һөрөмө, быуға катышып, өйгә еҫ тарата.* Һ. Дәүләтшина. *Тирә яҡта ут һәм һөрөм ине, яна ине туған тупрағым.* Н. Нәжми.

**2.** *кусм.* Ниҙеңдер аң-күңелгә тәьҫир иткән насар шауҡымы. *Дин һөрөмө. Хәсрәт һөрөмө.* / Күңелдәге ауыр хистең йөҙгә сыҡҡан билдәһе. *Маһикамалдың йөҙөн һөрөм баҫып йөрөнө.* Ш. Насыров.

**ҺӨРӨМ** [2] *и. кар.* **һөмөр.**

**ҺӨРӨМЛӨ** *с.* Һөрөмө [1] (1 мәғ.) булған, һөрөм буялған, һөрөм һеңгән.

**ҺӨРӨМЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Һөрөмлөгө әйләндереү, һөрөмлө итеү. *Йөҙҙө һөрөмләндереү.*

**ҺӨРӨМЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Һөрөм [1] сығарыу, һөрөмлө булыу. *Мейес соҡалтаһында һөрөмләнеп бишле лампа яна.* З. Биишева.

**2.** *кусм.* Ҡараңғы, күңелһеҙ төҫ алыу; ҡараңғыланыу. *Ҡояштың йөҙө һөрөмләнде.* Я. Вәлиев.

**ҺӨРӨМЛӘҮ** *к.* Һөрөмлөгә әйләндереү, һөрөмлө итеү. *Быяланы һөрөмләү.*

**ҺӨРӨНДӨ** *с.* Һөрөп, иген сәсә торған. *Ҡаҡтубә бригадаһында һөрөндө ер бик әҙ .. күберәк сабынлыҡ та мал көтә торған сиҙәм ер.* Ә. Вәли.

**ҺӨРӨНДӨРӨҮ** *к.* Барған ерҙә аяғын әләктереү, төртөлдөрөү. *Атты һөрөндөрөү.*

**ҺӨРӨНКӨ: ҡара һөрөнкө** ҡараға тартым, ҡара ҡусҡыл (тән төҫөнә ҡарата). *Ҡара һөрөнкө йөҙлө кеше.* ■ *Был кыҙҙың сәсе сөм-ҡара. Ҡаштары ла ҡара. Үҙе лә ҡара һөрөнкө.* Н. Ҡәрип.

**ҺӨРӨНКӨЛӘНЕҮ** *к.* Күңелһеҙ, ҡараңғы төҫ алыу. *Биккужа корошоп ҡуйҙы. Ҡаштары төйөрөлөп, асыҡ сырайы һөрөнкөләнде.* Т. Килмөхәмәтов.

**ҺӨРӨҢӨҮ** *к. кар.* **һөрлөгөү.**

**ҺӨРӨНТӨ** *и. кар.* **һөрөндө.**

**ҺӨРӨҮ** [1] *к.* **1.** Һуҡа-һабан менән ер өҫтөн аҡтарып йомшартыу. *Һөргән ер. Ер һөрөү. Һабан һөрөү. Пар һөрөү. Туңға һөрөү. Тәрән итеп һөрөү.* ■ *Мең-мең тракторҙар һөрөп йөрөй һинең ҡырыңды.* Ғ. Сәләм.

**2.** Һыҙырып ҡырыу; һөжөрөү. *Ер ҡыртышын һөрөү.*

**ҺӨРӨҮ** [2] *к.* **1.** Дөрләтеп, ҡыҙыулатып ҡыуыу. *«Телевизор ҡарай торған ваҡыт түгел, ана тышта уйнағыҙ!» — тип, Йәмиләнең әсәһе баҫҡыстан һөрә лә төшөрә.* Р. Низамов.

**2.** Яза рәүешендә алыҫ төпкөлгә оҙатыу; һөргөнгә ебәреү. *Хаҡлыҡ эҙләгәне, кешеләргә бәхет теләгәне өсөн уны [кешене] иленән һөргәндәр.* Ә. Чаныш.

♦ **Дан һөрөү** дан менән файҙаланыу; танылыу. *[Бай:] Иркәбай ҡустым, .. һин инде дан һөргән ат ҡарағы.* Ғ. Әмири. **Сафа һөрөү** *кар.* **сафа. Хөкөм һөрөү** *кар.* **хөкөм.**

**ҺӨРӨШӨҮ** *к. урт. кар.* **һөрөү** [1] 1. *Ер һөрөшөү.*

**ҺӨРП** *окш.* Шыйыҡ нәмәне тын менән ҡапыл тартып эскәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Һөрп итеү. Һөрп итеп һыу эсеп ебәреү.*

**ҺӨРПӨЛДӘТЕҮ** *к.* Һөрп-һөрп иттереү. *Һөрпөлдәтеп эсеү.*

**ҺӨРП-ҺӨРП** *окш.* Ҡабат-ҡабат һөрп иткән тауышты белдергән һүҙ. *Һөрп-һөрп иттереү.*

**ҺӨРТӨЛӨҮ** *к. төш. кар.* **һөртөү.** *Һөртөлгән өҫтәл.*

**ҺӨРТӨНӨҮ** *к.* Үҙ тәнеңдә, бит-ҡулыңды таҫтамал менән һөртөү. *[Мулла] солан бүрәнәһенә ҡаҡҡан сөйҙән ҡыҙыл башлы оҙон таҫтамал алып, уҡына-уҡына һөртөнә башланы.* Һ. Дәүләтшина.

**ҺӨРТӨҮ** *к.* **1.** Йомшаҡ нәмә менән ниҙелер ышҡып таҙартыу йәки коротоу. *Иҙәнде һөртөү. Ҡулды һөртөү. Саңды һөртөү. Күҙ йәшен һөртөү.* ■ *Рамазан йыуынып бөтөп, тәнен таҫтамал менән һөртә башланы.* Р. Низамов. *Ринат тәртипһеҙ бала, ул мәктәпкә бысраҡ аяҡтарын һөртмәй инә.* Р. Ниғмәти.

**2.** Өҫтән йөрөтөп ниҙер һылау; яғыу. *Биткә кершән һөртөү. Дарыу һөртөү. Йод һөртөү. Ҡыҙыл һөртөү. Май һөртөү.* ■ *Ҡыҙрас өлкән кейәүҙең яралы арҡаһына ябалаҡ майы һөртөп ҡуя* (Әкиәттән).

**3.** *кусм.* Урлау, сәлдереү. *Кәкте, сәлде һәм ул һөрттө, кәрәк урында төрттө, әммә «урланы» һүҙен тик Буҡәншин белмәй төптө.* С. Кулибай.

**ҺӨРТӨШӨҮ** *к. урт. кар.* **һөртөү.** *Иҙән һөртөшөү.*

**ҺӨРТТӨРӨҮ** *к. йөкм. кар.* **һөртөү.** *Дарыу һөрттөрөү.*

**ҺӨРТӘШ** *с.* Һорғолт, көрәнһыу (мал төҫөнә ҡарата). *Һөртәш ат. Һөртәш һыйыр.*

**ҺӨРҺӨҘ** *с.* Йәмһеҙ, насар (төҫкә ҡарата).

**ҺӨРҺӨТӨҮ** *к.* Иҫкертеп, боҙоп еҫләндереү (итте).

**ҺӨРҺӨҮ** *к.* **1.** Оҙаҡ тороп, ҡаҡланып, һөр еҫе алыу (иткә ҡарата). *Ирәндек тауының ҡаяларында йөрөп арығандан һуң, ҡул ситенә килеп, ут яғып, һөрһөгән иттәрҙе шеш менән утта бешереп, ҡымыҙ эсеп, ашап алалар* (Хикәйәттән).

**2.** Иҫкереп, боҙолоу, еҫләнеү (иткә ҡарата).

**3.** *кусм. мыҫҡ.* Эшһеҙ, хәрәкәтһеҙ торған кешегә ҡарата әйтелә. *[Ҡарт — улына:] Ни, .. был ваҡытта һөрһөп йоҡлап ятаһың, тор!* Б. Бикбай.

**ҺӨРӘ** *а. диал.* Тапҡыр, мәртәбә. *Ике һөрә айыу күрҙем.*

**ҺӨРӘН** *и.* Халыҡҡа ишеттереп йәки халыҡты саҡырып ҡысҡырған көслө тауыш. *Һағайҙым мин көҙгө елдәр аша ишетелгән таныш һөрәнгә.* К. Кинйәбулатова. **Һөрән һалыу** халыҡҡа ишеттереп йәки халыҡты саҡырып, ныҡ ҡысҡырыу.

*һөрән һалып илау.* ■ *Эште һиҙгәс, хужа һөрән һалған: «Бур Әхмәтте тиҙерәк тотоң!» — тип.* Ғ. Сәләм. *Һөрән һалыр ерҙә оран һалып, утәнең һин бер ул кушканды.* М. Кәрим.

**ҺӨРӘН-КЫЙКЫУ** *и. йыйн.* Кыскырышкан көслө тауыш. *Фашистарҙың күбеһе үсерек, үҙҙәре тәртипһеҙ рәүештә һөрән-кыйкыу кыскыралар.* Ж. Кейекбаев.

**ҺӨРӘНЛӘҮ** *к.* Халыкка ишеттереп йәки халыкты саҡырып, нык кыскырыу; һөрән һалыу. *Урал батыр күҙ күреме ерҙән ук: «Әй, дейеү, юл бир, мин Тереһыуға китеп барам! — тип һөрәнләне, ти.* «Урал батыр». **Һөрәнләп һөйләшеү** кыскырып һөйләшеү.

**ҺӨРӘНЛӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **һөрәнләү.** *Төйәләс һыуы буйлап йәш егеттәр һөрәнләшеп бесән сабалар* (Халык йырынан).

**ҺӨС** *ымл.* Этте котортоп, һөсләтә торған һүҙ. *Әбей күрҙе, ишек төбөндәге Алабайға карап: «Һөс!» — тине һәм Алабай шунда ук һаулай-һаулай бакса ситәненә һикерҙе.* Ғ. Ғүмәр.

**ҺӨСКӨРТӨҮ** *к. диал.* Һөсләтеү.

**ҺӨСЛӘТЕҮ** *к.* **1.** Этте, һөс тип, өрөргә, кыуырға өндәү. *Айрас Бүребайҙы һөсләтте. Бүребай абалап барып, кырандаска һикерҙе, Өлкаманды талай башланы.* Ш. Насыров. *Ғибәҙәт .. сыйырға бәйләп куйған этен ыскындырып: «Һөс, һө-ө-с! Кетмер, һөс, һөс!» — тип һөсләтте.* Я. Хамматов.

**2.** *күсм.* Кешене бер нәмәгә каршы котортоу. *Хәмзә бутай донъяны. Кешеләрҙе бер-береһенә һөсләтә.* Я. Вәлиев.

**ҺӨСЛӘҮ** *к. кар.* **һөсләтеү.** *Әллә ниндәй был Сафа .. этте һөсләй бесәйгә, сыйылдата көсөктө.* К. Кинйәбулатова.

**ҺӨСТӨКЛӘҮ** *к. диал.* Һөпөсөкләү.

**ҺӨСТӨРТӨҮ** *к. диал.* Һөсләтеү.

**ҺӨТ** *и.* **1.** Катын-кыҙҙың һәм инә һөтимәр хайуандарҙың күкрәк биҙенән бүленеп сыккан, яңы тыуған балаһын туйындырыу өсөн хеҙмәт иткән аҡ шыйык матдә. *Һөт биҙе.* ■ *[Fәйшә] етем үскән шул меҫкен, бер нәмә лә белмәй. Төрлө әҙәп, оят кейек хөрәфәттәр уға әсә һөтө менән инмәгән.* А. Карнай. *[Күсмәс хан:] Мин бер болан осраткайным, атмаксы булып, йәйәмде кулға алһам, болан апсая баҫты ла, имсәктәренән һөтө әйеп китте. «Куҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».* **Күкрәк һөтө** балаға имеҙгән әсә һөтө. *Бала тора-килә күкрәк һөтөнән төңөлдө, ашауға һалынды.* Ж. Кейекбаев. / Аҙык өсөн һыйырҙан, кәзәнән һ. б. хайуандарҙан һауып алынған шул шыйыклык. *Һыйыр һөтө. Бейә һөтө. Бешкән һөт. Сей һөт. Әсегән һөт. Һөт кайнатыу. Һөт һауыу. Һөт әсеү.* ■ *Мин тын да алмай йылы һөттө рәхәтләнеп эсәм дә эсәм.* Н. Котдосов. *Тәҙрә лә төбөндә ултырып, ойоном да йылы һөт кеүек* (Сеңләүҙән). **Айырткан һөт** сипарат менән каймағын айырып алған шыйык һөт. **Куйы һөт** сипараттан үткәрмәгән һөт. **Үле һөт** кымыҙ емләр өсөн кәрәгенән артык һыуығаи һөт. **Һөт айыртыу** һөттө сипараттан үткәреү. **Һөт төшөү** һөтләнеү (һөт биҙенә карата). **Ыуыҙ һөтө** *кара.* **ыуыҙ**[1] **1.**

**2.** Кайһы бер үҫемлектәрҙә йәки үҫемлектең орлоғонда була торған куйы һут. *Бәпембәнең һөтө. Һөтлөгәндең һөтө.*

◆ **Күгәрсен һөтө генә юк** һый-өрмәттен бик бай булғанын һөйләгәндә әйтелә. **Корт һөтө** бал корттарының өҫкө яңактарындағы биҙ күҙәнәктәре эшләп сығара торған матдә. **Һөткә ултырыу** емләнә башлау (игенгә карата). **Һөт өҫтөндәге каймак кеүек** рәхәт, кәҙер-хөрмәт менән. *Минең уйымды белһә, әсәйем бик нык йәбереһенер ине. «Һөт өҫтөндәге каймак кеүек үҫтең бит!» тиер ине.* З. Биишева. **Һөт теше** *шул ук* **имсәк теше** (*кар.* **теш 1**). **Һөт туғаны** (*йәки* **кәрҙәше**) бер инәне имгән ике сит бала (бер-береһенә карата). *Мин һөт кыҙы батшаһының кыҙымын. Атайым йортона етер-етмәҫтән һине каршы алырмын, тигән* (Әкиәттән). **Әсә һөтө** кыҙҙың кейәү йортона оҙатылыр алдан үҙ әсәһе кулынан эскән һуңғы һөтө.

● *Бер бейәнең ике имсәге — береһе кипһә, һөтө юк.* Әйтем. *Быҙауы үлгән һыйырҙың һөтө булмай.* Әйтем. *Коштоң һөтө юк, йылкының үге юк.* Әйтем. *Һыйыр һауған кәзә һауғандан һөт һораған.* Әйтем. *Һыйыр кото елендә, елененән алда телендә.* Әйтем.

**ҺӨТИМӘРҘӘР** *и. зоол.* Балаларын һөт менән тукландыра торған умырткалы хайуандар; имеҙеүселәр.

**ҺӨТ-КАТЫК** *и. йыйн.* Һөттән яһалған төрлө аҙык.

**ҺӨТЛӨ** *с.* **1.** Һөт кушылған, һөтө бар. *Һөтлө аш. Һөтлө сәй.* ■ *Рәхәтләнеп һөтлө сәй эсербеҙ тигәйнем, ризыкты өҙҙө бит!» — тип әсәйем бесәйҙе әләктереп алды.* Ғ. Минһажев.

**2.** Һөттө күп биргән. *Һөтлө һыйыр. Һөтлө кәзә.*

● *Үлгән һыйыр һөтлө була.* Әйтем.

**ҺӨТЛӨГӘН** *и.* Ике өлөшлөләр ғаиләһенә караған тар ғына вак япраклы, йәшел һары сук сәскәле, һөтлө үлән. *Һөтлөгәндәр, һары һөтлөгәндәр ерҙе каплап сәскә аткандар.* Р. Ғарипов. *[Кәзә йырлай:] Һөтлөгәндән һөт алдым, балтырғандан бал алдым, балакайым ишек ас!* (Әкиәттән).

**ҺӨТЛӨК** *и. һөйл.* Йәйләүҙәге һөт һаклай торған сокор.

**ҺӨТЛӨКӘЙ** *и. кар.* **һөтлөгән.**

**ҺӨТЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Һөтлөгә әйләнеү, һөтлө булыу. *Үлән шәбәйгәс, һыйыр һөтләнә.*

**2.** Һут йыйып өлгөрә башлау, һөткә ултырыу (ашлыкка карата). *Һөтләнеү осоро.* ■ *Гектарынан 400 центнер кукуруз һабағы һәм һөтләнеп балауыҙланып өлгөргән 100 центнер сәкән алынды.* А. Игебаев.

**ҺӨТСӨ** *и. һөйл.* Һөт һатыусы.

**ҺӨТСӨЛӨК** *и.* Һөт етештереү эше. *Һөтсөлөк совхозы. Һөтсөлөк фермаһы.* ■ *Колхоздың беренсе һөтсөлөк фермаһы йәмле Өсән йылғаһы буйына урынлашкан.* Д. Бүләков.

**ҺУҒАН** *и.* **1.** Ләлә һымактар ғаиләһенә караған эсе кыуыш кыяк япраклы, йомро төплө эсе йәшелсә. *Һуған орлоғо. Һуған сәсеү. Һуған үҫтереү.* ■ *Был түтәлдә һуғандар, уктай кыяк һуҙғандар.* Ғ. Ғүмәр. **Кара һуған** һыуыкка сыҙамлы күп йыллык төпһөҙ һуған. **Орлок һуғаны** орлок сәсеп үҫтерелгән вак һуған.

**2.** Шул йәшелсәнең ашай торған һабағы йәки төбө. *Бер бау һуған.* **Йәшел һуған** һуғандын йәшел һабак өлөшө, кыяғы.

3. *кусм.* Ҡайһы бер үсемлектәрҙең һабағы төбөндәге йомро өлөшө. *Тюлпандың һуғаны. Һуғанлы гөл. Һуғандан үҫтереү.*

♦ **Һуған һыуы һурыу** асығыу. *Һуған һыуы һурып каталашкала ятып караһын әле, шунан карарбыҙ.* И. Насыри.

● *Суфый һуған ашамаҫ, кабығын да ташламаҫ.* Әйтем.

**ҺУҒАНЛАУ** *к.* Һуған ҡушыу, һуған менән тәмләү, һуғанлы итеү. *Һуғанлап аш бешереү. Һуғанлап ашау.*

**ҺУҒАРТЫУ** *к. йөкм. кар.* **һуғарыу.** *Ат һуғартыу.*

**ҺУҒАРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **һуғарыу.** *Һуғарылған ат.*

**ҺУҒАРЫУ** *к.* **1.** Һыуға алып барып эсереү (малды). *Ат һуғарыу. Мал һуғарыу. Һуғарырға мәкегә алып барыу.* ■ *[Саҙрислам] аранға инде лә волостан еген кайткан атын етәкләп, Токанбаш шишмәһенә һуғарырға төшөп китте.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Һыуға туйындырыу (ерҙе); һыулау. *Һуғарыу каналы. Ер һуғарыу каналдары төҙөү.* / *кусм.* Күңелде ни менән дә булһа туйындырыу. *Дәрт менән һуғарыу. Өмөт менән һуғарыу.*

**3.** *кусм.* Ут кеүек ҡыҙҙырып һыуға һалыу (тимерҙе); сыныҡтырыу. *Корос һуғарыу.*

♦ **Эт һуғарыу** эшһеҙ, бушҡа ваҡыт уҙғарыу. *Эт һуғарып йөрөү.* ■ *Етәр һиңә эт һуғарып йөрөргә, ти атайым бер көндө,— әйҙә миндә прицепщик булып эшләп кара.* З. Хисмәтуллин. **Эт һуғарыр әҙәм юҡ** бер кеше күренмәй, бөтөнләй бер кем дә юҡ, тигән мәғәнәлә әйтелә. *Урамда эт һуғарыр әҙәм юк.*

**ҺУҒАРЫШЫУ** *к. урт. кар.* **һуғарыу** 1. *Мал һуғарышыу.*

**ҺУҒЫЛМА**[1] *и.* Йылға йәки юл барып ҡағылған урын.

**ҺУҒЫЛМА**[2] *и. диал.* Быума. *Һуғылма булыу.*

**ҺУҒЫЛТЫУ** *к. диал.* Осратыу.

**ҺУҒЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **һуғыу** 1—3, 6—8, 10—13. *Һуғылған ашъяулык. Һуғылған иген.*

**2.** Хәрәкәт ыңғайында ҡағылыу; бәрелеү. *Болоттар тау түбәләренә килеп һуғыла.* ■ *Төпкө тулкындарға кушылдым: төпкө тулкын өҫкә бәргән сакта каяларға, ярға һуғылдым.* Д. Юлтый. / *кусм.* Һүҙ менән ҡағылыу, һүҙ әйтеү. *[Татлыбикә — улына:] Кыҙ балаға каты һуғылыу ярамай, кыҙ хакы — тәңре хакы, тигән боронғолар.* Я. Хамматов. / *кусм.* Ҡағылыу, йоғоу (ауырыуға ҡарата). *Һыйырҙарға тел иҙелмәһе һуғылған.* Б. Бикбай.

**3.** Терәлә килеп, яҡынлау; яҡын килеү. *Тауға һуғылып аккан йылға.* ■ *Урамдың түбәнге осо ауылға һуғылып торған урманға барып төртөлә.* Н. Мусин. / *кусм.* Инергә, үтергә булып төртөлөү. *Бер нисә ишеккә һуғылып карағайнылар ҙа кәрәкле ҡешеләрҙе осрата алманылар.* Ғ. Ибраһимов. *[Байым:] Бер институтка һуғылып карағайным, конкурстан үтеп булманы.* К. Мәргән.

**4.** Берәр ергә китеп барғанда ҡайҙалыр боролоп инеү, инеп сығыу. *Ауылға һуғылыу.* ■ *Фермаға килешләй сак кына урау юл яһап, Көсөк ауылына һуғылып үтергә булдык.* Р. Шәкүр. *[Шофер:] Ярай, мин хәҙер утешләй идараға һуғылып, әйтем китермен.* Р. Солтангәрәев.

♦ **Ары бәрелеп, бире һуғылыу** *кар.* **ары. Ҡайҙа барып һуғылырға белмәү** ҡайҙа барырға, ни эшләргә белмәү. *Кайҙа барып һуғылырға белмәй аптырағас, актык аксабыҙҙы тотток та, Актубәгә билет алдык.* Т. Йәнәби. **Нукта һуғылмаған** *кар.* **нукта.**

● *Иләнмәгән, һуғылмаған, кайным, һиңә бер ыштан.* Әйтем.

**ҺУҒЫМ** *и.* Һуйыу өсөн тәғәйенләнгән мал. *Һуғым һимертеү. Һуғым һуйыу.* ■ *Кола айғыр ҙа йүгерек ине. Ул картайҙы. Әхмәҙи уны һимертеп, һуғым итте.* Ж. Кейекбаев. **Һуғым ашау** ҙур һуғым һуйған кешегә ҡунаҡҡа барып, шул ит менән ҡунаҡ булыу.

**ҺУҒЫМЛЫҠ** *и.* **1.** Һуғымға ҡалдырылған мал. *Калған аксаһына кунак сакырыу өсөн һуғымлык алырға уйлаһа ла, өлкән мал алып булмағанға .. бер өлкән куй һатып алды.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *кусм. һөйл.* Эшкә насар мал йәки кешегә ҡарата әйтелә.

● *Ат картайһа — һуғымлык.* Әйтем.

**ҺУҒЫУ**[1] (һуҡ*г*) *к.* **1.** Ҡул менән йәки башҡа берәр нәмә менән ныҡ ҡағыу; бәреү. *Аркаға һуғыу. Нык һуғыу. Йыға һуғыу. Кул менән һуғыу. Өҙә һуғыу.* ■ *Ул [Янһары] айыуҙарҙы шарт та шорт һуғып, кыуып алып киткән* (Әкиәттән). *Ошо алтын эйәргә менеп, атка һуғып алһаң, бараһы ереңә шунда ук барып етерһең* (Әкиәттән). / Көслө хәрәкәт ыңғайына ныҡ бәрелеү. *Ел утәнән-утә һуға. Буран өйрөлтөп һуға.*

**2.** Ергә йәки башҡа бер нәмәгә ҡуша бәреү. *Айыуғолак шунда ук Имән батырҙы күтәреп һуккан* (Әкиәттән).

**3.** Тауыш сығарыу өсөн нимәнелер йыш-йыш ҡағыу, бәреү. *Барабан һуғыу. Кыңғырау һуғыу. Саң һуғыу.* ■ *[Карт], кайтып йокларға вакыттыр инде, тип, шакылдағын һуға-һуға, кире китеп барҙы.* М. Тажи.

**4.** Ваҡыт иҫәбенсә дыңлатып ҡағыу, тауыш сығарып бәрелеү (сәғәткә ҡарата). *Кала сәғәте бөтә каланы яңғыратып, унды һукты.* И. Насыри.

**5.** Һулҡ-һулҡ итеп ҡағыу, тибеү (йөрәк, тамырға ҡарата). Тамыр *һуға.* ■ *Минең тәндәр әҫеле-һыуыклы булып китте. Йөрәк тә бер аҙға тиклем дөпөлдәтеп һуғып торҙо.* Т. Йәнәби.

**6.** Һыбай баҫтырып барып суҡмар менән йәнлек аулау, тотоу; *һунар итеү. Айыу һуғыу. Төлкө һуғыу.* ■ *Буранбай уҙ ғумерендә етмешләп кенә айыу алған, бүре һуккан.* Ж. Кейекбаев.

**7.** Ҡорал менән йәнсетеп ниҙер яһау; сүкеү. *Балдак һуғыу. Беләҙек һуғыу.* ■ *Алтын һуккан ике кулды кем бирҙе? Атам-әсәм, тыуған йортом — шул бирҙе.* К. Кинйәбулатова. / Ҡалыпҡа һалып ниҙер яһау. *Кирбес һуғыу. Саман һуғыу. Тиҙәк һуғыу.* / Ҡаҡҡылап, бәреп һ. б. юл менән ниҙер эшләү. *Койма һуғыу. Тәгәрмәс һуғыу.*

**8.** *кусм.* Таныҡлыҡ өсөн ниндәйҙер билдә һалыу; баҫыу. *Мисәт һуғыу.* ■ *[Өйҙөң] өрлөгөнә атай кулы буйҙан-буйға тамға һуккан.* М. Кәрим.

**9.** Бәреп йәки төртөп уйнау. *Бура туп һуғыу. Сәкән һуғыу. Туп һуғыу.* ■ *Малай-шалай сүрәкә һуға, йәш-елкенсәк өҙгөс, такта яргыс, сәпәмә туп уйнай.* Р. Солтангәрәев. *Беҙҙең тиргә һалған һарайҙарҙа биллиард һуғып ятҡан батшалар.* Ғ. Сәләм. / *һөйл.* Уйнау (домино һәм кәрткә ҡарата). *Домино һуғыу.* ■ *Өҫтәл тирәһендә ултырған малайҙар кәрт һуға.* Х. Мохтар.

**10.** Ҡағып, тапап, игендең орлоғон төшөрөү. *Ашлыҡ һуғыу. Көнбағыш һуғыу.* ■ *Был ҡышты мин ауыл байҙарына көнлөклэп утын, бесән ташып, эүен һуғып үткәрҙем.* Ғ. Минһажев. / *күсм. һөйл.* Ихласлап, ныҡлап ашау. *Ғәләү был ваҡиғанан файҙаланып, итте бик нык һуғып ҡалырға уйланы.* Т. Йәнәби. *Бала-саға йәйгеһен билдәле инде: ҡатыҡ менән икмәк һуға ла, һыу буйына китеп юғала.* Ғ. Амантай. / *күсм. һөйл.* Эсеү (араҡы һ. б.). *Бөгөн Ямай .. бер стакан араҡыны һуғып та сыҡҡан ине.* Д. Юлтый.

**11.** Бер яҡ ситкә ҡайырыу; ҡайҙалыр йүнәлеш алыу. *Һалдың ҡойроғон һуғыу.* ■ *[Ул] Буранбай тимер юл буйындағы һукмактан барҙы-барҙы ла, урман ситенә еткәс, һулаҡайға һуғып, берләм юлға төштө.* Т. Килмөхәмәтов. / *күсм.* Исемдәр менән килеп нимәнелер кире ҡаҡҡанды белдергән һүҙбәйләнеш яһай. *Кәңәште кире һуғыу.* ■ *Директор кешегә нисек отказ һуғаһың инде.* М. Тажи.

**12.** Электр, йәшен тейеп зарарлау. *Кешене ток һуға.* ■ *Балтаны .. йәшен һуғып йыҡҡан бер ялбыр ҡарағайҙың сытыры аҫтына тығып ҡалдырғандар.* М. Тажи.

**13.** *күсм.* Һауа, тәбиғәт тәьҫир көсө тейеп боҙоу, зарарлау. *Боҙ һуға. Монар һуға. Көн һуға. Ел һуғыу.* ■ *Бисәнең еләнен һатып, бер эсмин лек тары сәскәйнем, ҡырау һуҡты.* С. Агиш.

**14.** *күсм. һөйл.* Нимәнеңдер зәхмәте тейеү, һаулыҡты зыянлау, имгәтеү. *Зәхмәт һуғып ауырыу.* ■ *Ҡаза аяҡ аҫтынан сыҡты .. Фәрихте паралич һуҡты.* Ғ. Ильясов. / Ышҡыу, өйкәү (тәнде). *Аяҡты итек һуҡты. Ат муйынын ҡамыт һуҡҡан.*

**15.** *күсм.* Иҫәпкә алыу, һанлау. *Һанға һуғыу.* ■ *[Маруська — Тимакка:] Алартма күҙеңде, сүпкә лә һуҡмайым үҙеңде.* С. Мифтахов.

♦ **Аҡса һуғыу** *ҡар.* **аҡса. Алла** (*йәки* **хоҙай**) **һуғыу** дини хөрәфәт буйынса, насар эш өсөн алланан яза килеү. **Ауыҙға һуҡмаҫ** *ҡар.* **ауыҙ. Аяҙ көндә йәшен һуҡҡандай булыу** *ҡар.* **йәшен. Башҡа һуҡҡан кеүек булыу** ныҡ аптырау. **Баш һуҡҡан яҡҡа китеү** *ҡар.* **баш**[1]. **Гәп һуғыу** *ҡар.* **гәп. Күтәреп һуғыу** тотош ташлау. *Күтәреп һуғып сығып китеү.* **Ҡайтара һуғыу** *ҡар.* **ҡайтара. Ҡаҡ бәкәлгә һуғыу** *ҡар.* **бәкәл. Ҡырын һуғыу** *ҡар.* **ҡырын. Расходка һуғыу** расходка төшөрөү. *[Ныязгол:] Беләһеңме, һин мине купме расходка һуҡтың? Өс йөҙгә барып төштөң.* Һ. Дәүләтшина. **Телеграмма һуғыу** телеграмма ебәреү. **Төп күтәрә һуғыу** *ҡар.* **күтәреү. Түш** (*йәки* **күкрәк**) **һуғыу** ныҡ маһайыу. *Күкрәк һуғып маҡтаныу.* Өҫтәл һуғыу ярһыу. *Өҫтәл һуғып ҡысҡырыу.* **Һуғып алыу** хаҡын килешеп алыу. *[Ғариф] кәрәк нәмәһен .. хаҡына ҡарамай, һуғып ала ла, шуның менән баҙары бөтә.* Б. Бикбай. **Кем** (*йәки* **һуҡыр**) **һуҡты** йәштәр уйыны (ҡыҙҙар менән егеттәр ҡара-ҡаршы теҙелеп тора; уртаға бер егет менән бер ҡыҙ сыға; уларҙың күҙен бәйләйҙәр; ҡалған ҡыҙҙар менән егеттәр ҡул тотошоп, йырлап әйләнә, йыр бөткәс, тағы ҡара-ҡаршы теҙелеп тора; урталағы ҡыҙ теҙелеп торған егеттәрҙең береһенә, ә егет ҡыҙҙарҙың береһенә һуғырға тейеш була; дөрөҫ һуға алһалар — һуғылған кешеләр, һуға алмаһалар — үҙҙәре уртала була; уйын яңынан башлана).

● *Тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ.* Мәҡәл.

**ҺУҒЫУ**[2] (һуҡ*ғ*) *ҡ.* Арҡыры-буй ептәр һалып ишеп туҡыма яһау. *Балаҫ һуғыу. Киндер һуғыу. Таҫтамал һуғыу.* ■ *Бабай һалабаш батырған, йүкә ишкән, септә һуҡҡан, әбей йөн теткән, еп иләгән* (Әкиәттән). **Күтәреп һуғыу** биҙәк һалып һуғыу.

**ҺУҒЫШ** *и.* **1.** Ил, дәүләт йәки ижтимағи синыфтар араһындағы ойошҡан ҡораллы көрәш. *Бөйөк Ватан һуғышы. Донъя һуғышы. Империалистик һуғыш. Һуғыш асыу. Һуғышҡа китеү. Һуғыш ҡоралы.* / Ике ҡара-ҡаршы көстөң хәл иткес урындағы киҫкен бәрелеше; алыш. *Баррикада һуғышы. Сталинград һуғышы.*

**2.** Талаш-тартыштан сыҡҡан үҙ-ара туҡмаш. *Һуғышып йөрөү.* ■ *Бәкер .. шаҡмандарҙы яҡ ларға керешә. Китә һуғыш.* Б. Бикбай.

♦ **Граждандар һуғышы** бер ил эсендәге синыфтар араһында булған ҡоралды көрәш. *[Хафиз:] Мин ҡарт һалдатмын. Граждандар һуғышында ла ҡатнаштым. Мине партизан Хафиз тип йөрөтәләр.* М. Тажи. **Ҡул һуғышы** *ҡар.* **ҡул**[1] 1. **Һуғыш суҡмары** *ҡар.* **суҡмар.**

**ҺУҒЫШҠАҠ** *с.* Һуғышырға яратҡан. *Һуғышҡаҡ әҙәм.*

**ҺУҒЫШСАН** *с.* Һуғышырға оҫта, һуғышыуға батыр. *Һуғышсан ҡәбилә. Һуғышсан халыҡ.* ■ *Башҡорт атлылары, уларҙың һуғышсан сифаттары менән Багратион 1812 йылғы Ватан һуғышына саҡлы уҡ яҡшы таныш була.* Ә. Усманов.

**ҺУҒЫШСЫ** *и.* Һуғышта туранан-тура ҡатнашыусы; яугир. *Батыр һуғышсы. Һуғышсы булыу.* ■ *Минең өсөн партизан тормошо башланды .. Хәҙер инде мин дә һуғышсы инем.* Д. Исламов.

**ҺУҒЫШТЫРЫУ** *ҡ.* Кемдәрҙелер бер-береһе менән бәрелештереү. *Малайҙарҙы һуғыштырыу.*

**ҺУҒЫШЫУ** *ҡ.* **1.** Берәй ил, халыҡ менән һуғыш алып барыу. *[Һалдат:] Ана япон һуғышы булып уҙҙы. Унан башҡа ла беҙҙең Рәсәй ғүмер буйы һуғышҡан.* Д. Юлтый. *Ораторҙар килделәр: «Долой батша!» — тинеләр; һуҙ ҡуйышып һалдаттар: «Һуғышмайбыҙ!» — тинеләр* (Бәйеттән).

**2.** Үҙ-ара туҡмашыу. *Ҡанға туҙып һуғышыу. Һуғышып китеү.* / *күсм. һөйл.* Кем йәки ни менәндер көрәшеү. *Серәкәйҙәр менән һуғышҡанда ауыл иҫкә төшә.* Д. Юлтый.

● *Ағай-эне һуғышыр, атҡа менһә, ярашыр.* Мәҡәл. *Ике ҡарға һуғышһа, өсөнсөгә ем була.* Мәҡәл.

**ҺУҘАНЛАУ** *ҡ.* Оҙон һуҙа баҫыу.

**ҺУҘҘЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **һуҙыу.**

**ҺУҘМА** *и.* Урындыҡ түренә һуҙып йәйгән тар юрған. *Һуҙма түшәү. Һуҙма яһау.*

**ҺУҘМАҠАЙ** *с.* Эшкә яй ҡуҙғалыусан; ығыш. *Һуҙмаҡай булыу.*

**ҺУҘМАҠАЙЛАНЫУ** *ҡ.* Эшкә һ. б. яй ҡуҙғалыу, ығышыу. *Һуҙмаҡайланып йөрөү.*

**ҺУҘМАНЛАУ** *ҡ.* Берәр эште, хәрәкәтте һ. б. оҙаҡҡа һуҙыу. *[Председатель:] Әй, егеттәр! .. Һуҙманлап тормағыҙ, йәһәт кенә менеп ултырығыҙ.* Ғ. Әхмәтшин.

**ҺУҘЫЛМАҠЛЫ** *с. диал.* Һуҙмаҡай. *[Атаһы әсәһенә:] Шул малайыңды һуҙылмаҡлы итеп үҫтерәһең Үҫтереүен, һуңынан уға ҡыйын булыр.* К. Кинйәбулатова.

**ҺУҘЫЛМАЛЫ** *с. һөйл.* Һуҙыла торған. *Һуҙылмалы ҡайыш.*

**ҺУҘЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **һуҙыу.** *Һуҙылған бау. Һуҙылған ҡул.*

**2.** Тартылып, оҙонайыу. *Резинка һуҙыла. Сей тире һуҙыла.* / Яҙылып, оҙонайыу; оҙон булып яҙылыу. *Һуҙылып киреләү. Һуҙылып төшөп ятыу.* ■ *Яр башына менеп, урман яныныраҡ барып, сиҙәмгә һуҙылып яттыҡ.* Т. Йәнәби. / Нимәгәләр ынтылыу; һонолоу. *Икмәккә һуҙылыу. Һуҙылып алыу.* ■ *«Нан!» — тип һуҙған бала ҡулдарын шул һуҙылған көйө буш ҡалды.* М. Кәрим.

**3.** Оҙон булып, буйҙан-буйға дауам ителеү. *Был шишмәгә ҡая битләп һығыла-бөгөлә һуҡмаҡ һуҙылған.* З. Биишева. *Өйҙөң артына таҡалып, яланға ҡарай емеш һәм йәшелсә баҡсалары һуҙыла.* Ғ. Дәүләтшин.

**4.** Оҙаҡ дауам ителеү. *Йыл буйына һуҙылыу. Оҙаҡҡа һуҙылыу.* ■ *Ямғыр яуырға тотондо. Иген йыйыу эше һуҙылды.* Я. Хамматов.

**5.** Яй ҡуҙғалыу (ниҙер эшләгәндә), мыштырлау. *Һуҙылып йөрөү.*

**ҺУҘЫЛЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **һуҙылыу** 2. *Һуҙылышып ятыу. Һуҙылышып йөрөү. Һуҙылышып үҫеп китеү.*

**ҺУҘЫМ** *и.* **1.** Оҙонлоҡтоң дауамы. *Һыҙыҡтың һуҙымы. Юлдың һуҙымы.*

**2.** Ваҡыттың дауамы; дауам иткән ваҡыт араһы. *[Һалдаттар] бер нисә көн һуҙымында бер ҡабым ҡайнар аш төҫө күрмәгән.* Д. Юлтый.

**ҺУҘЫНҠЫ** *с.* **1.** Оҙонға һуҙыулы. *Ҡаланың оҙонға үҫеүе водопровод, газопровод һәм канализация селтәрен кәрәгенән артыҡ һуҙынҡы итә.* М. Хисмәтов.

**2.** *лингв.* Һауаны ауыҙҙан иркен үткәреүгә ҡоролған, һуҙып әйтелә торған. *Һуҙынҡы өндәр.* // *Ҡалын һуҙынҡылар. Нәҙек һуҙынҡылар.*

**ҺУҘЫУ** *ҡ.* **1.** Тартып, киреп оҙонайтыу. *[Шәмсиә] йомшаҡ, һарғылт дөйә йөнөн һуҙып-һуҙып иләй ине.* Һ. Дәүләтшина. *Гармуныңды һуҙып уйна үҙең яратҡан көйгә* (Халыҡ йырынан).

**2.** Турайтыу, төҙ рәүешкә килтереү; һоноу, яҙыу. *Аяҡты һуҙып ултырыу. Муйынды һуҙыу.* ■ *Сабир мулла буй һуҙып урында ята.* И. Ғиззәтуллин. *Бер рәсемдә Ленин тора, уң ҡулын һуҙып алға.* Р. Ниғмәти. *Аҡмырҙа ҡылысын һуҙып күпер аҫтынан сыҡҡан* (Әкиәттән). / Ынтылып, нимәгә йәки ҡайҙалыр йүнәлтеү; һоноу. *Ашҡа ҡулды һуҙыу.* ■ *Йылдар иркен тип уҡ төкөрмәгеҙ үҙегеҙ ҡашыҡ һуҙған табаҡҡа.* М. Кәрим.

**3.** Кемгәләр берәй нәмәне тоттороу, биреү өсөн ынтылыу; һоноу. *[Шәхми:] «Йә, түрә, кил, берҙе эсеп ебәрәйек»,— тип, стаканды инспекторға һуҙҙы.* Т. Йәнәби.

**4.** Буйҙан-буйға, оҙонлоҡҡа тартыу. *Килен юл буйына дилбегәне һуҙып һала* (Әкиәттән). / Берәй аралыҡҡа, оҙонлоҡҡа нимәләр теҙеү, үткәреү. *Сым һуҙыу. Һыу торбаһы һуҙыу. Ҡанау һуҙыу.* ■ *Әй, йәмле лә Урал буйҙары, еле һуҙып ҡолон бәйләүе* (Халыҡ йырынан).

**5.** Көйҙө, моңдо оҙон итеп башҡарыу. *Тауышты һуҙыу. Һуҙып тын алыу. Һуҙып әйтеү. Һуҙып уҡыу. Һуҙып йырлау.* ■ *«Бура-ан», тине Ғариф ҡарт һуҙып.* Б. Бикбай. *Йырлайыҡ та, дуҫтар, һуҙып-һуҙып, бер йырламай күңел баҫылмай* (Халыҡ йырынан).

**6.** Оҙаҡ ваҡытҡа тартыу, дауам иттереү. *Оҙаҡҡа һуҙыу. Һүҙҙе оҙонға һуҙыу. Эште һуҙыу. Ваҡытты һуҙыу.* ■ *Көн ярымлыҡ юлды бер аҙнаға һуҙып, .. Өфөгә лә килеп индек.* С. Агиш. *[Бай:] Мулла ағай, һуҙма, никахты тиҙерәк уҡы* (Әкиәттән).

**7.** Оҙаҡ ваҡытҡа еткерергә тырышыу. *[Үмәр ҡарт] был игенде ҡалайтып ҡына һуҙһаң да, йыл әйләнәһенә .. етмәйәсәген уйлап ҡуйҙы.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Аяҡ һуҙыу** үлеү. **Ҡул һуҙыу** *ҡар.* **ҡул**[1].

**ҺУҘЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **һуҙыу** 2. *Сым һуҙышыу. Бау һуҙышыу.* ■ *Зөләйха туташ менән ҡул һуҙыштыҡ.* Т. Йәнәби.

**ҺУЙҘАЙ** *с. һөйл.* Килешһеҙ, самаһыҙ оҙон. *Һуйҙай әҙәм. Һуйҙай булып ятыу.*

**ҺУЙҘАЙЫУ** *ҡ.* Самаһыҙ оҙон булып һуҙылыу. *Һуйҙайып ятыу. Һуйҙайып үҫеп китеү.*

**ҺУЙҘАН** *с.* **1.** Әҙ ботаҡлы, үҙе төҙ һәм нәҙек оҙон. *Һуйҙан ағас.*

**2.** Нәҙек оҙон кәүҙәле. *Һуйҙан кеше. Һуйҙан булыу.*

**ҺУЙҘАНЛАУ** *ҡ.* Эшһеҙ-ниһеҙ тегендә-бында һуғылыу. *[Егет:] Мин көн дә артель эшендә. Ана улыңды яҙ: йәй буйы урам буйында һуйҙаңлап йөрөүҙән бушамай.* Н. Мусин.

**ҺУЙҘЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **һуйыу.**

● *Яман ҡатын яңғыҙ атың һуйҙырыр.* Мәҡәл.

**ҺУЙҠАЙ** *с. диал.* Һөҙәк. *Һуйҡай урын.*

**ҺУЙЛАҠТАЙ** *с. ҡар.* Һуйҙай. *Һуйлаҡтай булып ятыу.*

**ҺУЙЫЛ** *и.* Оҙон, һығылмалы таяҡ. *Һәр икебеҙ ҡулға оҙон һуйыл алып, бүреләрҙе ҡубырғытырға йыйындыҡ.* Й. Солтанов.

● *Һуҡмаҫ һуйыл күтәрер.* Мәҡәл.

**ҺУЙЫЛДАЙ** *с.* Оҙон кәүҙәле, ҙур (балаларға ҡарата). *Һуйылдай булып үҫеү.*

**ҺУЙЫЛЛАУ** *ҡ.* Һуйыл менән, таяҡ менән туҡмау. *Революция сыҡҡас, халыҡ теге әрәм тамаҡ заводчиктарҙы һуйыллап ҡыуған.* Ж. Кейекбаев.

**ҺУЙЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **һуйыу.** *Һуйылған мал.*

**2.** Ҡубып һыҙырылыу. *Йорт ҡырындағы ҡарт ҡайындың шаҙра ҡабыҡтары һуйылған.* Ғ. Хәйри.

● *Таштан йүкә һуйылмай.* Әйтем.

**ҺУЙЫНДЫ** *и.* Ҡабығы эрселгән ағас.

**ҺУЙЫР** *и.* Ҡорҙар ғаиләһенә ҡараған эре урман ҡошо. *Һуйыр ите.* ■ *Әрәмәлек арьяғында һуйырҙар уйнаған, ҡорҙар кетерҙәгән тауыш ишетелде.* Я. Хамматов. *Бер аҙ баргас ҡолағыма*

*корк-корк-корк иткән тауыш сальшды. Һуйыр был.* Н. Мусин. **Буйҙаҡ һуйыр** инә һуйыр. **Ҡара һуйыр** ата һуйыр.

**ҺУЙЫРТАШ** *и.* Бик ҡаты шыма таш (юлға түшәүгә, төҙөлештә һ. б. ҡулланыла). *Юлға һуйырташ түшәү.* ■ *Бына, һуйырташ түшәлгән киң, төҙ урамдан юрға аттарын бейетеп .. һылыу-һылыу бисәләр, .. мөһабәт ирҙәр .. уҙып китә.* З. Биишева. *Көҙгө һымаҡ йылтыр һыулы йылғалар аша үргып, һуйырташ менән буралған уларҙың тирә-яғы.* М. Тажи. *Камчаткала еүеш елдәр иҫә һәм ере лә һуйырташ ҡына.* Ғ. Әмири.

**ҺУЙЫУ** *к.* **1.** Малды салып, тейешенсә эшкәртеү. *Һыйыр һуйыу.* ■ *Ертыңлар батыр йылҡы өйөрөнән бер бейәне тотоп һуйған да, ҡаҙан тултырып ит бешергән* (Әкиәттән). / Бысаҡ һ. б. менән яралап үлтереү. *Һуйып китеү. Һуйып сығыу.*

**2.** Ҡуптырып һыҙырыу; тунау (мал, йәнлектең тиреһен, ағастың ҡабығын һ. б.). *Йүкә һуғыу.* ■ *Ҡатын-ҡыҙ, хатта аяҡтан баҫҡан бала-сағаға тиклем имән, тал ҡайыры һуйырға йөрөй.* Ж. Кейекбаев.

◆ **Бысаҡһыҙ һуйыу** үтәү өсөн ауыр нәмә талап итеп, кешене бик ауыр хәлгә ҡалдырыу. **Һуйған да ҡаплаған** *кар.* **ҡаплау. Таштан йүкә һуйыу [менән бер]** *кар.* **йүкә.**

● *Һигеҙ һарыҡ һуйма, һимеҙ һарыҡ һуй.* Мәҡәл. *Аҡыллы тәкә һуйғанда, ахмаҡ йүкә һуйыр.* Мәҡәл.

**ҺУЙЫШ** *и.* Аяуһыҙ ҡан ҡойош, үлтереш. *Көслө һуйыш булған. Һуйыш сығыу.* ■ *Ерҙә һуйыш, һуғыш кәрәк түгел, беҙ тыныслыҡ талап итәбеҙ!* А. Игебаев.

**ҺУЙЫШЫУ** *к.* **1.** *урт. кар.* **һуйыу.** *Мал һуйышыу.*

**2.** Үҙ-ара сәнсешеү. *Һуйышып бөтөү.* ■ *Шул тиклем ярһып һуйышҡан Дәүләтбай ағай — офицерҙы уртаға ярып төшөргән.* Ә. Вахитов.

**ҺУК: һуҡ бармаҡ** баш бармаҡ менән урта бармаҡ араһындағы бармаҡ. *Хәйруллин мине бик йәтеш кенә итеп, һук бармағы менән саҡырып ала.* С. Агиш.

**ҺУКА** *и.* Ер һөрә торған иң яба ауыл хужалығы ҡоралы (ике тәртәле, тәгәрмәсһеҙ була). *Ағас һука. Һука менән һөрөү.*

◆ **Һука баш** япа-яңғыҙ, бөтөнләй яңғыҙ. *Туғандарым үлеп бөтөп һука баш ултырам.*

**ҺУКАЙЛАУ** *к. диал.* Һылтыҡлау.

**ҺУКАЛАҠ** *с. диал.* Туҡалаҡ.

**ҺУКАЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **һукалау** 1. *Һукаланған ер.*

**ҺУКАЛАУ** *к.* **1.** Һука менән һөрөү. *Сафа ашығып .. һукаламаған ерҙең бер башына аттарын килтереп туктата* (Әкиәттән).

**2.** *диал. кар.* **һупалау** 2. *[Гәрәй:] Мин бит төрки таныйым, яҙыуҙы ла бер аҙ һупалайым.* А. Таһиров.

**ҺУКАЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **һукалау** 1. *Ер һукалашыу.*

**ҺУКАСЫ** *и.* Һука менән ер һөрөүсе; һука һөрөүсе. *Һукасы Сафаға ер һукалау күңелле* (Әкиәттән).

**ҺУКБАЙ** *и.* Ил араһында йөрөгән йортһоҙ, малһыҙ кеше; берәҙәк.

**ҺУКБАЙЛАНЫУ** *к.* Һукбай рәүешендә булыу, һукбай булыу. *Һукбайланып йөрөү.*

**ҺУККЫ** *и.* **1.** Борон һунарҙа, яуҙа ҡулланылған суҡмар башлы таяҡ. *Шул ваҡыт ҡырҡ һаҡсы һукҡы алып, баяғы йыртҡыс менән һуғыш һалған.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**2.** Ҡапҡандың ҡыҫа торған дуғаһы.

**ҺУККЫС** *и.* **1.** Ашлыҡ һуға торған машина. *Ырҙындарҙа һукҡыс машиналар көлтә бөркөп күкрәй, гөр килеп.* Т. Йәнәби.

**2.** (*йәки* **һукҡыс барабан**) Шундай машинаның башаҡтан игенде тирә торған өлөшө. *Комбайндың һукҡысы.*

**ҺУКЛЫҒЫУ** (һуклыҡ*ә*) *к.* **1.** Хәрәкәт ыңғайында килеп һуғылыу, ҡаҡлығыу. *Ҡар елдәре өйөрөлөп, һуклығалар туң ярға.* Х. Назаров.

**2.** *кар.* **һуғылыу** 4.

**ҺУКЛЫКТЫРЫУ** *к.* Нимәгәлер алып барып юлыҡтырыу. *Юлдар уны [Сәғитовты] ҡайҙа ғына илтеп ташламаны ла, ҡайҙа ғына һуклыктырманы.* Й. Солтанов.

**ҺУКМА**[1] *с.* Һуғып, сүкеп яһалған. *Һукма ҡайсы.*

◆ **Һукма юл** үлән баҫҡан иҫке юл.

**ҺУКМА**[2] *и. диал.* Сепрәк балаҫ.

**ҺУКМАҠ** *м.* Йәйәү кеше йәки мал йөрөй торған тар юл. *Һукмак һалыу.* ■ *Төн ҡараңғылығы эсендә бер генә ат үтерлек тар һукмаҡ буйлап, ҡыр ҡаҙҙары кеүек теҙелеп, Ҡунаҡбаев полкы бара.* Б. Хәсән. / *күсм. һөйл.* Тормоштағы йүнәлеш. *Әйтсе, Бурыл, ә һуң йәшәр өсөн ҡайһы һукмаҡ менән баралар?* Ғ. Сәләм.

**ҺУКМАЛАУ** *к. диал.* Һукҡылау. *Һукмалап алыу.*

**ҺУКРАНДЫРЫУ** *к.* Һукранырға сәбәп биреү. *Кешене һукрандырыу.*

**ҺУКРАНЫУ** *к.* Ризаһыҙлыҡ менән һөйләнеү. *Һукранып йөрөү.* ■ *«Беҙҙең был этләнеүебеҙ бер бөгөн түгел бит инде. Өйҙө ҡыйыҡлап, кеше рәтенә индерәм тиһәң, һин һәр ваҡыт ҡаршы тораһың",— тип әсәһенә һукрана-һукрана ҡыуыш ҡороу яғын ҡарай башланы Миңлебай.* Т. Йәнәби. *Ғәлим ағайҙың: «Эштән арып ҡайтҡан балаға ашарға ирек бирмәйһең»,— тип һукранған тауышы ишетелде.* Д. Юлтый.

**ҺУКРАНЫШЫУ** *к. урт. кар.* **һукраныу.**

**ҺУКТА** *и.* **1.** Емеш-еләктең, япраҡтың һабағы, каса япрағы.

**2.** Ҡош-ҡорттоң яңы сығып килгән ҡауырһын төбө.

**ҺУКТАЛЫ** *с.* Һуктаһы менән бергә өҙөп йыйылған. *Һукталы балан. Һукталы муйыл.*

**ҺУКТЫРЫУ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **һуғыу** 1—8, 12. *Барабанды һуктырыу. Бура һуктырыу. Иген һуктырыу. Ҡул менән һуктырыу. Һуктырып яҙалау.*

**2.** *күсм.* Һүҙҙе нимәгәлер йүнәлтеү, нимәгәлер төбәү. *Алпаров күберәк өгөтләргә, кешенең намыҫына һуктырырға ярата.* Я. Вәлиев. *Бер заман .. ат ҡараусы Бәҙри һорау бирмәҫме! «Теге,— ти,— .. ике кәбән бесән ҡайҙа осто икән?» Бына һиңә кәрәк булһа, ҡайҙа һуктыра бит.* Б. Бикбай.

**3.** *күсм. һөйл.* Юл йөрөштө ҡайҙалыр йүнәлтеү. *Тау аша һуктырыу.* ■ *Кешеләр бер ауыл-*

*дан икенсе ауылга, түтәнән түтә һуктырып, калтагай менән генә йөрөй башланылар.* М. Тажи.

**ҺУҠЫР** *с.* **1.** Күреү һәләтенән мәхрүм; күрмәҫ. *Һукыр кеше. Һукыр күҙ. Дөм һукыр. Тома һукыр. Һукыр булыу. Һукыр итеү.*

**2.** *күсм.* Тормошта күп нәмәне аңлай белмәгән; томана. *Ул ауыл хужалыгы мәсьәләләре буйынса тома һукыр бер кеше ине.* С. Ҡудаш.

♦ **Күҙле һуҡыр** күренеп торған нәмәне күрмәй эҙләгән кешегә әйтәләр. **Күрә һуҡыр** *шул ук* **күрә ҡарау** (*кар.* **ҡарау**). **Һуҡыр [бер] тин** *кар.* **тин. Һуҡыр себен** *кар.* **ләпәкәй. Һуҡыр сысҡан** *кар.* **сысҡан. Һуҡыр тырнаҡ** *кар.* **тырнаҡ. Һуҡыр тәкә** *диал.* һәпәләк. **Һуҡыр шәм** *кар.* **шәм 1. Һуҡыр эсәк** *кар.* **эсәк 1.**

● *Һукырга көн дә бер, төн дә бер.* Мәҡәл. *Һукырҙың теләгәне ике күҙ.* Мәҡәл.

**ҺУҠЫРАЙТЫУ** *к.* Һуҡырға әйләндереү, һуҡыр итеү. *Кешене һукырайтыу.*

**ҺУҠЫРАЙЫУ** *к.* Һуҡырға әйләнеү, һуҡыр булыу. *Һукырайып калыу.* ■ *Иллә мәгәр атаһы бик йонсоган, Биктимер өсөн кайгырып, күҙҙәре һукырайган, ти* (Әкиәттән).

**ҺУҠЫРАС** *с. һөйл.* Күреү һәләте насар; күрер-күрмәҫ. *Һукырас булыу.*

**ҺУЛ** *с.* **1.** Кәүҙәнең йөрәк яғындағы. *Һул аяк. Һул күҙ. Һул кул. Һул кабырга. Һул як.* ■ *[Аты — Биктимергә:] «Һул колагыңдан инеп, уң колагымдан сык»,— ти* (Әкиәттән). *Каһым түрә фарман биргән бакта, һай кем, һул кулында булыр курайы* (Халыҡ йырынан). / *и. мәг.* Шул яҡтағы тараф. *Юлдың береһе уңга, икенсеһе һулга китә икән, ти* (Әкиәттән).

**2.** Политик йәһәттән киҫкенерәк, алдынғыраҡ ҡарашлы. *Һул агым. Һул эсерҙар. Парламенттың һул фракцияһы.*

**3.** Революцион һүҙгә ышыҡланған ваҡ буржуаз йәки оппортунистик ҡарашлы. *Һул тайпылыш.*

**4.** *кар.* **тиҫкәре** 4. *Кейемдең һул ягы. Һул ягын әйләндереү.*

**ҺУЛА** *и.* Һөйәк һәм нервы системаһының үҫеше боҙолғандан барлыҡҡа килгән балалар ауырыуы; рахит.

**ҺУЛАҠАЙ** *с.* **1.** Һул ҡул менән эшләгән. *Һулакай кеше. Һулакай булыу.*

**2.** *кар.* **һул** 1, 4. *Һулакай кул. Һулакай аяк. Һулакай колак. Кейемдең һулакай ягын әйләндереү.*

● *Һулакайга һурпа юк.* Мәҡәл.

**ҺУЛАУ** *к.* Үпкәгә һауа алып сығарыу; тын алыу. *Еңел һулау. Тәрән һулау.* ■ *Бүлмә тын. Тик бүлмәнең тынлыгын беҙҙең йыш-йыш һулауыбыҙ ғына боҙа.* Ғ. Хәйри.

**ҺУЛҠ-ҺУЛҠ** *окш.* **1.** Һулҡылдап һыҙлауҙы белдергән һүҙ. *Һулк-һулк итеп һыҙлау.* ■ *Йөрәгем дә берсә тук-тук, һулк-һулк кагып тора.* Р. Назаров.

**2.** Өҙөк-өҙөк тын тартып илаған хәрәкәт һәм тауышты белдергән һүҙ. *Мәгфирә .. Садрисламдың кукрәгенә капланып, һулк-һулк илай башланы.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҺУЛҠЫЛДАТЫУ** *к.* Туҡтауһыҙ ауыртып тороу. *Һулкылдатып иҫке яраны, .. бер йыр калка.* Р. Бикбаев.

**ҺУЛҠЫЛДАУ** *к.* **1.** Ҡан йөрөшө, йөрәк тибеше тәьҫирендә ауыртып, өҙөк-өҙөк һыҙлап тороу. *Һулкылдап һыҙлау.* ■ *Һулк-һулк итеп һулкылдап, канап яткан яраны күреп тора Уралың.* Р. Ниғмәти.

**2.** Һулҡ-һулҡ тын тартыу (илағанда). *Сәгиҙә юрганын башынан аша бөркәнде лә, һулкылдап-һулкылдап иланы.* М. Тажи.

**ҺУЛҠЫУ** *к. кар.* **һулҡылдау.**

**ҺУЛПАЙЫУ** *к. диал.* Ҡыйшайыу, ялпайыу.

**ҺУЛПЫ** *и.* Һула ауырыуының көслө төрө.

**ҺУЛПЫҠ** *с. диал.* Ҡыйыш.

**ҺУЛЫ: һулы һайын** һәр ваҡыт, йыш. *Һулы һайын беҙгә килә.*

**ҺУЛЫҒЫУ**[1] (һулыҡ*ғ*) *к.* Һурылып кибеү; һулыу. *Беҙҙең госпиталгә напалмга бешкән малайҙы килтерҙеләр .. Күҙ алдында һулыгып агара, һүнә бара, бисара.* «Ағиҙел», 1968, № 12.

**ҺУЛЫҒЫУ**[2] (һулыҡ*ғ*) *к. диал.* Йотлоғоу. *Һулыгып тын алыу. Һулыгып һыу эсеү.* ■ *Һалкын шишмәм һыуҙарыңды һулыгып-һулыгып эсәм мин.* Х. Ҡунаҡбай.

**ҺУЛЫҠЛАУ** *к. диал.* Һулҡылдау.

**ҺУЛЫМ** *и. диал.* Батҡыл юл.

**ҺУЛЫТЫУ** *к.* Һулыған хәлгә килтереү; шиңдереү. *Сәскәне һулытыу.*

**ҺУЛЫУ**[1] *к.* **1.** Кибеү, шиңеү (үҫемлектәргә ҡарата). *Вакыты етһә, кыҙыл гөлдәр һулыр бер көн, һулыр бер көн* (Бәйеттән).

**2.** *күсм.* Һурылып, ябығып, кибеү; шиңеү. *Уларҙың [балаларҙың] нурлы йөҙө күҙгә күренеп һулый, биттәренә аслык билдәләре сыга.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҺУЛЫУ**[2] *и. диал.* Һулыш.

♦ **Һулыу һайын** әйләнгән һайын, йыш. *Һулыу һайын ашарга һорай.*

**ҺУЛЫШ** *и.* Тереклектәрҙең үпкәһендәге һауа алмашыныуы; тын алыш. *Иркен һулыш. Һулышһыҙ калыу.* ■ *Катындың төҫтәре агарган, күҙҙәре ҙурайган, һулыштары кыҫылган, гыж-гыж килә.* Д. Юлтый. / Үпкәлә алмашынған һауа; тын. *Эҫе һулыш.* ■ *Бала тыугас, каты кыскырып, ала тиҙәр тәүге һулышты.* Н. Нәжми. / *күсм.* Нимәнеңдер яһаған тәьҫире, йоғонтоһо. *Заман һулышы. Яҙ һулышы.* ■ *Яҙ һулышы бөрөләрҙе наҙлай, яҙгы нурҙар йөҙгә ягыла.* Ш. Бикҡол.

**ҺУМ** *и.* Йөҙ тингә тиң булған аҡса берәмеге; тәңкә. *Биш һум. Ун һум.* ■ *Кеҫәгә кырк һум акса һалып, кыуана-кыуана Ырымбурга киттем.* Т. Йәнәби.

♦ **Һум ағас** сапмаған, юнмаған көйө ниҙер яһауға тәғәйенләп ҡуйған бөтәү ағас. **Һум алтын** 1) иң юғары сифатлы алтын; 2) *күсм.* иң яҡшы, кәҙерле, шәп. *Ун һигеҙ йәш һум алтын яурыныма кош бирҙең* (Ҡобайырҙан). **Һум тимер** бөп-бөтөн ҡалын тимер. **Һум шешек** бот төбөнә сыҡҡан башһыҙ ҙур шешек.

● *Кеше ишеге һум тимер.* Әйтем. *Тамсы тамып күл яһай, тин йыйылып һум яһай.* Әйтем. *Һуңгы катын һум алтын.* Әйтем.

**ҺУМАЛА** *и. диал.* Ыҫмала. *Һумала һымак кара.*

**ҺУМАЛАҠ** *и. кар.* **һупалаҡ.**

**ҺУМАЛАҠЛАУ** *к. кар.* **һупалаҡлау 1.**

**ҺУМАЛТАЙ** *р. кар.* **һумалтыр.**

**ҺУМАЛТЫР** *с.* **1.** Матурлап яһалмаған, арлы-бирле эшләнгән; тупаҫ. *Һумалтыр нәмә.*

**2.** *күсм.* Ауыр кәүҙәле, шөкәтһеҙ, килбәтһеҙ, килешһеҙ. *Һумалтыр кеше.*

**ҺУМЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **һумлау.**

**ҺУМЛАУ** *к.* Ҡыйынса ғына тейешле рәүешкә килтереү (һуңынан еренә еткереп эшләү өсөн). *Урмандан көрәк һумлап алып ҡайттым.* ■ *Байдәүләт ҡарт ҡырандас күсәренә яҫтыҡ һумлай ине.* Т. Килмөхәмәтов. / Арлы-бирле итеп яһау. *Утар эсе ҡараңғы. Шырпы һыҙҙым. Ишектән кергәс тә, бер мөйөштә усағы бар икән. Балта менән һумлап эшләгән һикеһе лә бар.* Ж. Кейекбаев.

**ҺУМЛЫҠ** *и.* Бер һумға торошло көмөш аҡса. *Көмөш һумлыҡ.* ■ *Еңгәләре фатимаға .. әллә ниндәй батшалар башы төшөрөлгән һумлыҡтар һәм ваҡ көмбәҙҙәр уратылған, төрлө мунсаҡтар менән ҡайылған ауыр һаҡал таҡтылар.* Ж. Кейекбаев. *Атаҡайым биргән һумлыҡты биҙәкәйе бөтмәй ташламам* (Сеңләүҙән).

**ҺУМПАЙЫУ** *к. диал. кар.* **тумпайыу** 2.

**ҺУМСА** *и. диал.* Самбуса.

**ҺУН** *и.* 2—4 быуаттарҙа Урал алдында күсмә һәм урындағы ҡәбиләләрҙән ойошҡан күсмә халыҡ. *Һун төрөктәре.* ■ *Ғалимдар һун ҡәбиләләрен боронғо төрки телдәрҙең береһендә һөйләшеүсе халыҡ булған тип баралар.* Н. Мәжитов.

**ҺУНА** *и.*, **һуна өйрәк** ҡыр өйрәктәре араһында иң ҙур өйрәк. *Һуна өйрәк алыу.* ■ *Заятүләк атлы улы ҡаңғылдатып ҡаҙ алды, ти, .. быҡылдатып һуна алды, ти.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». *Ҡарсығанан ҡасҡан һуна өйрәк толҡа тапмаҫ екән ҡамышһыҙ* (Халыҡ йырынан).

**ҺУНАҒАРА** *и.* Ҡарсығалар ғаиләһенә ҡараған һырты ҡара-көрән, ҡорһағы аҡ, түше буй-буй һыҙатлы бик ҙур йыртҡыс ҡош.

**ҺУНАР** *и.* **1.** Ҡырағай ҡош һәм йәнлектәрҙе тотоу, атыу эше; ау. *Өйрәк һунары. Төлкө һунары. Һунар эте. Һунар ҡошо. Һунар мылтығы. Һунар ваҡыты.* ■ *Мин Ҡарауыҙҙы бер нисә тапҡыр ҡуян һунарына алып сыҡтым.* С. Кулибай. *Биктимер үҙе һунарға йөрөй, ҡош-ҡорт, йәнлек алып ҡайта, ә бисәһе яңғыҙы өйҙә ҡала, ти* (Әкиәттән).

**2.** Тотоп, атып алған ҡош-йәнлек. *Һунар алыу.* ■ *Аҡназар һунарға сыға. Тәүге ҡар булғанға ул көндө .. йәнлек тә осрамай, һунарһыҙ ҡайта* (Хикәйәттән). *Егетем, атҡан һунарың өйрәк түгел, аңла һин; Шулғән батша ҡыҙы булам, мине ҡулдән алма һин.* «Аҡбуҙат».

□ **һунар итеү** һунар менән шөғөлләнеү, һунарлау.

**ҺУНАРЛАУ** *к.* Һунар эше менән шөғөлләнеү, һунар итеү. *[Урал — Һомайға:] Һунарлаған сағымда ҡулға төшкән бер ҡоштан, һеҙҙең илдә үлемдән ҡотолорға юл бар тип, ишеткәйнем мин йәштән.* «Урал батыр».

**ҺУНАРСЫ** *и.* Һунар менән шөғөлләнеүсе, һунар итеүсе. *Яҡшы һунарсы. Һунарсы булыу.* ■ *Әүәл заманда бер һунарсы йәшәгән, ти .. Ауламаған йәнлеге, атмаған ҡошо, тотмаған балығы ҡалмаған, ти, бының* (Әкиәттән). *Шоңҡар сөйгән һунарсы, ҡош сөйҙөрмәй сыҙармы.* «Аҡбуҙат».

**ҺУНАРСЫЛ** *с. һөйл.* Һунарға әүәҫ, һунарға шәп. *Һунарсыл кеше.*

**ҺУНАРСЫЛАУ** *к.* Һунар менән шөғөлләнеү, һунар итеү. *Һунарсылап йөрөү.*

**ҺУНАРСЫЛЫҠ** *и.* Һунар эше; аусылыҡ. *Боронғо башҡорт ҡәбиләләренең төп кәсептәренең береһе һунарсылыҡ булған.* Ж. Кейекбаев.

□ **һунарсылыҡ итеү** һунар менән шөғөлләнеү; һунар итеү.

**ҺУҢ**[1] *р.* Тейешле ваҡытынан аҙаҡ, артҡа ҡалып (эшләү, хәрәкәт итеү һ. б. ҡарата). *Һуң тороу. Һуң ҡайтыу. Яҙ һуң килде.* ■ *Беҙҙең яҡ — ҡырыҫ яҡ, ашлыҡ һуң өлгөрә.* Р. Низамов. *Бик һуң инде. Алҡа һымаҡ ай ҡалҡты.* Х. Ғиләжев.

◆ **һуңға ҡалыу** билдәле ваҡытына өлгөрмәү, кисегеү; һуңлау. *Һуңға ҡалып барыу. Дәрескә һуңға ҡалыу.* **Һуңға табан** күпмелер ваҡыт үткәс; һуңғараҡ. *Клавдия ла башҡа беҙгә ҡушылып, .. көлөп маташты. Һуңға табан .. илай башланы.* Д. Юлтый.

● *Бурысыңды һуңға ҡалдырма, ҡылысыңды ҡында ҡалдырма.* Мәҡәл.

**ҺУҢ**[2] *бәйл.* Сығанаҡ килештәге һүҙҙәр менән килеп, билдәле бер хәл, ваҡыттың аҙағын белдерә. *Төштән һуң. Ямғырҙан һун. Бер аҙҙан һуң.* ■ *Мөхәббәт шундай ғәжәп .. ямғырҙан һуң ҡалҡа торған салауат күпере һымаҡ.* Р. Ниғмәти. *Сәйҙән һуң Заһит Гөлйөҙөм еңгәһе янына килде.* Һ. Дәүләтшина.

◆ **Иртәнән һуңға** өсөнсө көнгә. *[Үмәр:] Ҡоҙалар иртәнән һуңға кис киләләр.* Һ. Дәүләтшина.

● *Ҡунаҡтың көнө өс, унан һуң йорт эйәһенә көс.* Әйтем. *Уҡ баһаһы атылғандан һуң, һүҙ баһаһы әйтелгәндән һуң.* Әйтем.

**ҺУҢ**[3] *киҫ.* Телмәргә көсәйтеү мәғәнәһе эмоциональ төҫ биреп, баҫым яһай. *Һуң нисек ҡасмаҡ та, нисек ҡотолмаҡ кәрәк!* И. Насыри. *Һуҡтыҡ та һуң балыҡты!* Ф. Иҫәнғолов. *Ә һеҙ үҙегеҙ кем һуң? — тигән Ҡулбатыр* (Әкиәттән).

**ҺУҢҒАРЫ** *р.* Аҙаҡтан, һуңынан. *Беҙ һуңғары һөйләшербеҙ.*

**ҺУҢҒАРЫУ** *к. диал.* Һуңлау. *Һуңғарып килеү.*

**ҺУҢҒЫ**[1] *с.* **1.** Башҡаса булмай торған, аҙаҡҡы (берәр хәл, күренеш һ. б. ҡарата). *Һуңғы дәрес. Һуңғы осрашыу.* ■ *Ә тышта был йәйҙең һуңғы көнө.* Ғ. Сәләм.

**2.** Кем йәки ниҙәндер ҡалған, аҙаҡҡы. *Һуңғы тин.* ■ *Тып-тын ғына тәүге ҡарҙар яуа һуңғы япраҡ менән аралаш.* Р. Бикбаев.

**3.** Алда булған, булып үткәндәрҙән иң аҙаҡҡы, хәҙергенән алдағы. *Һуңғы ай. Һуңғы йыл.* ■ *Һуңғы көндәрҙә театрҙан ҡапыл биҙә башланы ул [Фатима].* Б. Бикбай. / Иң аҙаҡҡы, аҙаҡҡы мәлдәге. *Зөфәр һуңғы хәбәрҙе ишеткәс, ҡыҙыҡһынып һүҙгә ҡушылды!* Һ. Дәүләтшина. / *күсм.* Хәл иткес; ҡәтғи. *Һуңғы талап.* ■ *Ул [Йәнтимер] һуңғы һүҙен әйтте: «Тиҙерәк табырға тырыш!» — һәм күҙҙән юғалды.* С. Агиш.

**4.** Әле генә донъяға сыҡҡан, иң яңы. *Һуңғы хәбәрҙәр. Һуңғы яңылыҡтар менән танышыу. Журналдың һуңғы номеры.*

◆ **Һуңғы сиккә етеү** түҙеп торғоһоҙ хәлгә килеү. *Асыу кешене һуңғы сиккә еткерә бит.* Б. Бикбай.

● *Һуңғы дөйәнең йөгө ауыр.* Әйтем.

**ҺУҢҒЫ**[2] *и. диал. Һуңғылыҡ.*

**ҺУҢҒЫЛЫҠ** *и.* Бала тапҡандан һуң төшә торған инә ҡарынындағы бала яткыһы. *Һуңғылыгы төшөү.*

**ҺУҢЛАТЫУ** *к.* Тейешле ваҡытҡа өлгөртмәү; һуңға ҡалдырыу.

**ҺУҢЛАУ** *к.* Тейешле ваҡытҡа өлгөрмәү, кисегеү; һуңға ҡалыу. *Эшкә һуңлау. Һуңлап килеү.* ■ *Бөтәһе лә һуңлап килде минә, яҙмыш йөрөнө гелән шаяртып, һуңлап килде йәшлек, килде шигыр йәшлегемдәй сәсен агартып.* Н. Нәжми. *Улар Кейеҙбайҙы зиндандан ҡотҡарырга һуңлагандар икән шул: батша уны уҙгынсы сауҙагәргә биреп ебәрергә өлгөргән* (Әкиәттән).

**ҺУҢРА** *р. диал.* Һуңынан. *Һуңра килеп кит әле.*

**ҺУҢСЫЛ** *с. һөйл.* Һуңға ҡалыусан. *Һуңсыл кеше.*

**ҺУҢЫНАН** *р.* Күпмелер ваҡыттан һуң, аҙаҡтан. *Һуңынан килеү.* ■ *Уйындар башланды. Башта һүрән ине, һуңынан ҡыҙа төштө.* С. Агиш.

● *Әүәл яфа күрмәй, һуңынан вафа килмәй.* Әйтем.

**ҺУҢЫНДА** *р.* Нимәнеңдер аҙағында. *Ҡырга сыҡ ямгыр һуңында — һәр тугайҙан һил сыгыр.* Ш. Бабич.

**ҺУП**[1]: **һуп бармаҡ** *шул уҡ* **һуҡ бармаҡ** (*кар.* **һуҡ**). *Әхмәдуллин маңлайына шапылдатып һуга ла һуп бармагын күтәреп: төп мәсьәлә. Шулай итеп төп мәсьәләне тотоп ала белергә кәрәк шул, ти.* Ш. Насыров. *Фәйзулла кәләмде баш бармагы һәм һуп бармагы менән йәплән тота.* Ф. Иҫәнголов.

**ҺУП**[2] *ымл.* Баланы башлап аяҡ өҫтө баҫтырырға өйрәткәндә, һикерткәндә дәртләндереп әйтелгән һүҙ. *Һуп, һуп, һупыс та бигерәк матур бәпес тә.* Ғ. Амантай.

□ **Һуп итеү** *бал.* аяҡ өҫтө баҫыу; тороу. *Йә, балам, һуп ит.* **Һуп итеп тороу** кеше ҡушҡан йомошто һ. б. хәҙер үк үтәргә әҙер тороу. *[Иҙел:] Сәлимәне ебәрергә кәрәк .. Атҡа ултырып фәлән ергә барып ҡайт тиһән, ул һуп итеп торор ине.* Ш. Насыров.

**ҺУП**[3] *окш.* Ябалаҡ, мөншөгөр тауышын белдергән һүҙ.

**ҺУПАЙ** *и.* Ябалаҡтар ғаиләһенә ҡараған сыйырсыҡтан ҙурыраҡ, ҡолаҡһыҙ йомро башлы төнгө ҡош. *Бейек тирәк ҡыуышында һупай ыңгыраша.* З. Биишева. **Һупай турғай** ябалаҡтар ғаиләһенә ҡараған бәләкәйерәк һупай.

**ҺУПАЙҘЫ** *и. кар.* **һупай.**

**ҺУПАЙЫУ** *к.* Ҡабара биреп, ҡалҡыныу. *Һупайып ултырыу.*

**ҺУПАЛАҠ** *и.* Балсыҡ, ҡорот һымаҡ нәмәнән йомарлаған йомғаҡ. *Бер һупалаҡ май. Һупалаҡ яһау.*

**ҺУПАЛАҠЛАУ** *к.* **1.** Балсыҡ, ҡорот һымаҡ шыйыҡ нәмәне сәпәп йомро итеү; йомарлау, йомғаҡлау.

**2.** *диал.* Һупалау.

**ҺУПАЛАУ** *к.* **1.** Яҡшылап, матурлап тормай, арлы-бирле итеп эшләү; этмәләү. *Өмөтбайҙың өйө кәкере-бөкөрө ҡайын агасынан һупалап ҡына яһалган.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Икенсе бер телдә уҡыу-яҙыу, йыр-көй һ. б. яҡшылап белмәй әҙ-мәҙ һөйләү, башҡарыу, маташыу; маташтырыу. *Иҫкесә һупалайым. Русса һупалау.* ■ *Элек самауыр төҙәтеүселәрҙен күбеһе башҡортстаны яҡшы һупалай торган урыҫ ҡарты була торгайны.* Ә. Вахитов.

**ҺУПАТА** *с.* Ауыр, лупыш кәүҙәле. *Һупата кеше.*

**ҺУПҠЫН** *и. диал.* Һапҡан. *Һупҡын уйнау.*

**ҺУПЛАУ** *к.* Һуп[2] тип ҡысҡырыу (ябалаҡҡа ҡарата). *Һуплаган өкө тауышы ҡара урмандар буйлап яңгырай.* М. Тажи.

**ҺУПЫЛДАҠ** *и. диал.* Һупай.

**ҺУПЫЛДАУ** *к.* Һуп[3] иткән тауыш сығарыу; һуп итеү. *Алмаш-тилмәш ҡасырга торган һыу үгеҙҙәре һупылдауынан башҡа тауыш юҡ.* А. Таһиров.

**ҺУР** *с. диал.* Ҙур. *Һур булыу. Һур үҫеү.*

● *Аягы һур гәйрәтле булыр.* Әйтем.

**ҺУРАП** *и. диал. кар.* **сар**[2]. *Һурабынан юллаган айыу.*

**ҺУРҒЫС**[1] *и. һөйл.* Ниҙелер һура, һурҙыра торған ҡорамал. *Сап һургыс. Ярма һургыс.* // *Һургыс торба.*

**ҺУРҒЫС**[2] [*рус.* сургуч] *и.* Тиҙ иреп, тиҙ ҡата торған ҡыҙғылт ыҫмала (мисәт һуғыу, шешә көпләү һ. б. кәрәк өсөн ҡулланыла). *Һургыс менән мисәтләү.*

**ҺУРҘАЙЫУ** *к. диал.* Һорнайыу. *Һурҙайып үҫеп китеү.*

**ҺУРҘЫРҒЫС** *и.* Нимәнелер һурҙыра торған ҡорамал. *Бал һурҙыргыс. Һыу һурҙыргыс.*

**ҺУРҘЫРТЫУ** *к. йөкм. кар.* **һурҙырыу.** *Кешенән бал һурҙыртыу.*

**ҺУРҘЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **һурҙырыу.** *Баганалар һурҙырылып ташланган.*

**ҺУРҘЫРЫУ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **һурыу.** *Теште һурҙырыу.*

**2.** Ниҙер ярҙамында һурыу. *Һыу һурҙырыу.*

◆ **Бал һурҙырыу** рамдағы балды бал ҡыуғыстан үткәреп таҙартыу, ҡыуыу. **Ярма** (*йәки* **иген**) **һурҙырыу** тирмән ярҙамында ҡабығынан һыҙыртып, ярма яһау. *Тары һурҙырыу. Һоло һурҙырыу.*

**ҺУРҠЫУ** *к. диал.* Һурығыу. *Ямгырҙан һуң ер бер аҙ һурҡҡан, тик соҡор-саҡырҙарҙа гына һыу йыйылып ҡалган.* З. Хисмәтуллин.

**ҺУРНАҠ** *и.* **1.** Сәскәнән бал йыймай, умарталағы балды ашап йөрөгән уғры ҡорт. *Умартаны һурнаҡ баҫа.*

**2.** *күсм. шул уҡ* **эрәм тамаҡ** (*кар.* **эрәм**[2]). *[Альберт — Хәйретдингә:] Һөйләнмә, борол тиҙәр һиңә! Һурнаҡ булып йәшәнең.* Г. Ибраһимов.

**ҺУРНАС** *и. диал. кар.* **һурнаҡ** 1.

**ҺУРПА** *и.* Ит бешергәндә аштың шыйыҡ өлөшө. *Тауыҡ һурпаһы. Һимеҙ һурпа. Һурпалы ит.* Һурпа ҡатыҡҡлау. *Һурпа эсеү.* ■ *Һөйәклэп ит ашап, урындыҡта түгәрәлеп ултырып тороп һурпа эскәс, Зөлхизә әбей йомош тапҡан кеше булып, тышҡа сыгып китте лә, ҡабат өйләнеп инмәне.* Н. Мусин. **Балыҡ һурпаһы** балыҡтан бешерелгән аш; халау. **Кәбеҫтә һурпаһы** кәбеҫтә

ашы. *Көн дә эсе кәбеҫтәнән бешә һалдат аштары. Шул кәбеҫтә һурпаһынан сыға хинзир баштары* (Бәйеттән).

◆ **Ҡуян һурпаһының һурпаһы** *мыҫҡ.* бәйләнеше, мөнәсәбәте бик алыҫ нәмәләргә ҡарата әйтелә. *Бына әле лә икенсе ярҙамсынын өсөнсө урынбаҫары булып ҡына йөрөйөм. Йәғни, ҡуян һурпаһынын һурпаһы.* Ә. Бикчәнтәев.

● *Ите — иткә, һурпаһы — биткә.* Мәҡәл. *Ҡоҙаның ҡоҙаһы — ҡуян һурпаһының һурпаһы.* Әйтем. *Ҡуяндың итен ҡур ҙа һурпаһынан төңөл.* Мәҡәл.

**ҺУРПАЛАУ** *ҡ.* Һурпалы итеү. *Һурпалап бешереү.*

**ҺУРПАЛЫ** *с.* Һурпаһы бар, һурпа менән бешерелгән. *Һурпалы итеү. Һимеҙ һурпалы.* ■ *Муйылбикәнең һурпалы ит ҡурҙағы .. бик тәмле тойолдо.* Һ. Дәүләтшина.

**ҺУРПАЛЫҠЛЫ** *с.* Һурпаға сығышлы. *Һурпалыҡлы ит.*

**ҺУРПЫС** *и.* Бысаҡ һ. б. ҡоралдың ағас һапҡа тыға торған өлөшө.

**ҺУРЫҒЫУ** (һурыҡ*ғ*) *ҡ.* **1.**Һыулы, дымлы нәмә еллән, һарҡып, бер аҙ кибеү. *Һурыҡҡан бесән.* ■ *Көн асыла төштө, юл да һурыға башланы.* М. Тажи. *Ер асылһа, тиҙерәк ер һурыҡһа, тракторҙар сығыр ярышҡа.* Б. Вәлит.

**2.** *күсм.* Төҫ ташлап, ябығыу; һурылыу. *Кәрим һуңғы көндәрҙә һурыға. Төпкә ултырған күҙҙәре ҙурайып ҡалған.* Я. Хамматов.

**ҺУРЫҠТЫРЫУ** *ҡ.* Бер аҙ киптереү, ҡоротоу. *Бесәнде һурыҡтырыу. Иртәнге ел юлды һурыҡтырған.*

**ҺУРЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **һурыу** 1. *Арғымаҡтар ерҙе сапсып торған һәм ҡылыстар ҡындан һурылған.* Р. Ниғмәти.

**2.** Кейҙергән, тығып ҡуйған ерҙән кире ысҡыныу. *Арбаның күсәре һурыла.* ■ *Ишек өҫкө күгәненән һурылып сығып, салыш аҫылынып тора.* Б. Бикбай./ *күсм.* Уралған, ҡамалған ерҙән шылып ысҡыныу. *Ҡосаҡтан һурылып сығыу.* ■ *Толобонан һурылып сығып, Садрислам юл ситенә һикерҙе.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** *күсм.* Төҫ ташлап, ябығыу. *Һурылған йөҙ.* ■ *[Рәхимә]һуңғы көндәрҙә генә бер аҙ ябығып, һурылып китте.* К. Кинйәбулатова.

◆ **Йөрәк һурылыу** ауыр хәлдән, кисерештән ныҡ борсолоп ҡайғырыу, әсенеү; йән әсеү.

**ҺУРЫУ** *ҡ.* **1.** Кейҙерелгән, тығылған ерҙән кире тартып ысҡындырыу. *Сөйҙө һурыу. Ҡындан ҡылысты һурыу.* ■ *Әхмәҙулла бабай ҡаҡшаған ишекте сыңғаһынан һурып алды ла, йүнәтерғә тотондо.* Ә. Вахитов. *Көмөш йөҙөгөңдө һурып бир, йәнем алып ҡалды, тиерһең* (Халыҡ йырынан)./ Үҫкән, ултырған еренән тартып сығарыу. *Тешге һурыу. Ағасты тамыры менән һурып алыу.*

**2.** Ауыҙға ҡабып, ҡыҫҡылап, тын менән тартыу; имеү. *Имсәкте һурыу. Бармаҡты һурыу. Кәнфит һурыу.* ■ *Ул [Тимошка] өҫтәлдән ситтәрәк һаман тәмәке һурып ултыра.* Ж. Кейекбаев.

**3.** Тын йәки һауа көсө менән тартып, ниҙелер сығарыу. *Ас һөлөктәр .. тәнгә йәбешәләр ҙә ҡан һура башлайҙар.* Һ. Дәүләтшина. *Вышкалар тәрән-тәрәндән һуралар ерҙең майын.* Р. Ниғмәти.

**4.** Уптырып йәки ер менән тартып эскә һөйрәү. *Ҡамыш төбө бата, мине һура.* Д. Юлтый. *Күл, йылға һыуҙарын ҡойон һурып ала.* Д. Бураҡаев./ *күсм.* Алыу, үҙләштереү. *[Ҡылысбаев:] Улар [мелиораторҙар] аҡсаны минән алмай, туранан-тура дәүләт кеҫәһенән һура.* И. Ғиззәтуллин.

**5.** Тамыр аша туҡланыу (үҫемлектәргә ҡарата). *Ерҙән һурыу.*

**ҺУҪАР** *и.* **1.** *ҡар.* **һыуһар.** *Һуҫар бер ваҡытта ла ерҙән йөрөмәй, ағастан-ағасҡа ырғып, гел ағас башынан китә.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *диал.* Шәшке. *Һыу буйында һуҫар күп, ҡойроҡтары йонар күк* (Халыҡ йырынан). *Һыуҙа йөҙә белә микән һуҫарҙын балалары* (Халыҡ йырынан).

**ҺУТ** *и.* **1.** Үҫемлек, емеш-еләк туҡымаһындағы шыйыҡлыҡ. *Айыу һоло һабаҡтарын .. ҡосаҡлап, башаҡтың һөтлө һутын лас-лос имеп, баҫыуҙы тапап, әрәм итеп тик йөрөй ул.* Ҡ. Даян. / Эсер өсөн еләк-емештән, йәшелсәнән һығып алынған шыйыҡлыҡ. *Алма һуты. Еләк һуты. Кишер һуты. Һут эсеү.* ■ *Емештәрҙән татлы һут ҡала, мөхәббәттән һүнмәҫ ут ҡала.* А. Игебаев.

**2.** Кеше һәм тереклектәрҙең аш ҡайнатыу ағзаларындағы шыйыҡлыҡ. *Ашҡаҙан һуты. Эсәк һуты.* ■ *Аҙыҡ ашҡаҙан һәм эсәк аша үткән саҡта аш һеңдерә торған төрлө һут менән еүешләтелә.*

◆ **Ер** (*йәки* **тупраҡ**) **һуты** үҫемлектәрҙе туҡландырған тупраҡ дымы.

**ҺУТЛАНЫУ** *ҡ.* Һут (1 мәғ.) барлыҡҡа килеү, һутлыға әйләнеү, һутлы булыу. *Һәр бөрөнән яҙ еҫтәре аңҡый, зифа аҡ ҡайындар һутлана.* А. Игебаев. *Йәмле лә һуң йәй көндәре, үләндәр һутланған саҡ.* Н. Иҙелбай.

**ҺУТЛЫ** *с.* Һутҡа бай, һуты күп. *Һутлы аҙыҡ. Һутлы емеш. Һутлы үлән.*

**ҺУШ** [*фарс.*] *и. ҡар.* **иҫ** 2, 3. *Һуш китеү. Һушҡа килеү. Һушты алыу. Һушты йыйыу. Һушты юғалтыу.* ■ *[Алпамыша:] йөҙөң күрһәм, күҙем ҡамаша, Барсынһылыу, .. һуштан яҙам, ҡылып тамаша.* «Алпамыша».

**ҺУШҺЫҘ** *с. ҡар.* **иҫһеҙ.** *Беҙ шулай китергә булдыҡ .. Әсәйем һушһыҙ булып ятып ҡалды.* Д. Юлтый.

**ҺУШҺЫҘЛАНЫУ** *ҡ. ҡар.* **иҫһеҙләнеү.**

**ҺУЯ** *р. һөйл.* Дәртле итеп, көслө, ныҡ. *Һуя атлап йөрөү. Һуя һуғыу.*

**ҺУЯҺЫНАН** *р. һөйл.* Шартлатып, шартлата. *Һуяһынан әшләп ташлау. Һуяһына атлап барыу.*

**ҺҮГЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **һүгеү.**

● *Яҡшы менән һөйләшһәң, алтын-көмөш түгелер, яман менән һөйләшһәң, атаң-әсәң һүгелер.* Мәҡәл.

**ҺҮГЕНЕҮ** *ҡ.* Ҡаты, оят һүҙҙәр менән әрләшеү, оят, тупаҫ һүҙҙәр әйтеү. *Аҡтарҙың офицерҙары элеккегә ҡарағанда ла ярһыуыраҡ .. һис бер һүҙ һайлап тормай, инәһе-атаһы менән һүгенәләр.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҺҮГЕҮ** (һүк*г*) *к.* Ҡаты итеп әрләү. *Ул [Новиков] көнө буйы һүгенә. Һүгышын да, батшаһын да, крәҫтиәнен дә һүгә.* Д. Юлтый. **Эт итеп** *йәки* **эттән алып, эткә һалып, эттән эткә һалып һүгеү** бик яман итеп, ныҡ әрләү. *Яман кеше маҡтанһа, ишектән ингән кешене эттән алып һүктем, тир* (Ҡобайырҙан).

● *Ата һүккән аш юйыр, әсә һүккән йәш ҡойор.* Мәҡәл.

**ҺҮГЕШ** *и.* Әрләш, талаш. *Ҡарғыш, һүгеш, шау-шыу, илаш — гөмүмән, ҙур ығы-зығы башланды.* Ә. Вахитов.

**ҺҮГЕШЕҮ** *к.* **1.** *урт. ҡар.* **һүгеү.** *Ер алыуға ялмауыҙҙар йүгерештеләр, үҙ-ара талаштылар, һүгештеләр* (Бәйеттән).

**2.** *диал.* Һүгенеү.

**ҺҮГӘН** *и. диал.* Һеүән.

**ҺҮҘ** *и.* **1.** Ысынбарлыҡтағы берәй предметты, күренеште, төшөнсәне аңлатҡан өндәр теҙмәһенән торған телмәр берәмеге. *Һүҙҙең мәғәнәһе. Һүҙ яһалышы.* ■ *Бабай уны нигә «Шүркә тауы» тип атағандар. Шүркә ни тигән һүҙ һуң ул?* М. Тажи./ Грамматик терминдар составында килә. *Ярҙамлыҡ һүҙ. Ябай һүҙ. Модаль (мөнәсәбәт) һүҙ. Инеш һүҙ.* **Оҡшатыу һүҙҙәре** төрлө нәмәләрҙең, тәбиғәт күренештәренең, шулай уҡ ҡош-ҡорттарҙың һ. б. тауышына, хәрәкәтенә, һынына оҡшатыу нигеҙендә яһалған һүҙҙәр. **Һүҙ төркөмдәре** һүҙҙәрҙең грамматик төрҙәре.

**2.** Ике арала әйтелгән хәбәр. *Һүҙ һөйләү.* ■ *Хафиз ҡарт айный төштө, һүҙҙе икенсегә борон ебәрҙе.* М. Тажи. *Ҡаһым түрә фарман биргән саҡта әйтер һүҙкәйҙәре хаҡ ине* (Халыҡ йырынан). **Аҙ һүҙле** һүҙгә һаран. *Аҙ һүҙле милиционер эште ҡыҫҡа тотто.* Б. Бикбай. **Йылы һүҙ** күңелде иретерлек яҡшы һүҙ. *Йылы һүҙ ишетеү.* **Ҡаты һүҙ** күңелде рәнйетерлек ауыр һүҙ. *Уразлин эшселәргә ҡарата ҡаты һүҙле .. бер кеше.* Ғ. Ғүмәр. **Ҡырын һүҙ** ҡаршылашып әйткән яман, насар һүҙ. **Оло һүҙ** мәғәнә көсө ҙур булған хәбәр. *[Йәмғәле:] Ай, оло һүҙ әйтәһең, балам.* С. Агиш. **Тапҡыр һүҙ** *ҡар.* **тапҡыр** [2]. **Туҙға яҙмаған һүҙ** әҙәм ышанмаҫлыҡ буш хәбәр. *«Ҡуйсы,— Алтынбикә ҡул һелтәне,— туҙға яҙмаған һүҙ һөйләмә .. шундай уҡымышлы башың менән.* М. Тажи. **Әйтһәң һүҙ, төртһәң күҙ** берәр хәбәрҙе, хәлде һ. б. ғәйеп итеп, яман күреп һөйләгәндә әйтелә.

**3.** Әйтеп белдергән кәңәш, тәҡдим. *Оло һүҙен тыңлау. Һүҙ әйтеү.*

**4.** Халыҡ алдында һөйләгән сығыш, телмәр. *Һүҙ һөйләү.*/ Телмәр әйтеү хоҡуғы. *Һүҙ алыу. Һүҙ биреү.*

**5.** Кем, йәки ниҙер хаҡында халыҡ араһында йөрөгән төрлө хәбәр. *Насар һүҙ бар. Яҡшы һүҙ йөрөү.* ■ *[Рәхимә:] Беҙгә сит ялсылар ҙа бөтмәгән, тик йорттан һүҙ ишетеп тороуы яҡшы түгел.* Һ. Дәүләтшина.

**6.** Ниҙер хаҡындағы вәғәҙә. *Һүҙ биреү. Һүҙҙә тороу.* **Һүҙ ҡуйышыу** вәғәҙәләшеү. *Зәйнәп менән Сәйҙел .. ошо төндә һүҙ ҡуйышты йәшәү юлын бергә ҡушырға.* Ғ. Сәләм.

**7.** Талаш, әрләш. *Һүҙ сығарыу. Һүҙ сығыу. Юҡтан һүҙ сығарыу.*

**8.** Көй сығарылған әҙәби текст. *Йырҙың һүҙе башта аңлашылмаһа ла, Юлия .. тыңлай башланы.* Һ. Дәүләтшина.

◆ **[Ауыҙҙан] һүҙ алыу** бер нәмәне әйттереү, һөйләтеү. **[Ауыҙҙа] һүҙ тормау** сер һаҡламау. *[Сынбулатов:] Ҡара, Тәнзилә еңгә, һинең ауыҙыңда һүҙ тормай торған. Был хаҡта .. сәсеп ташлайһы булма.* М. Тажи. **Бер ауыҙ һүҙ** бер аҙ, әҙ генә. *Наилә минән бер ауыҙ булһа ла һүҙ көтә. Мин өндәшмәйем.* С. Агиш. **Бер һүҙле булыу** әйткән фекерҙә ныҡ тороу. *Аҡназарға икеләнергә урын ҡалманы: «Ир үлһен дә дан ҡалһын! Ир-егет бер һүҙле булыр»,— тине лә, намыҫҡа талашып, ысынтылап ҡунаҡ саҡырырға булды.* Ғ. Дәүләтшин. **Ваҡ һүҙле** юҡ-барға иғтибар итеп һөйләнеүсән. *Мин бара торған ҡәйнәне ваҡ һүҙле лә тинеләр* (Сеңләүҙән). **Ике һүҙҙең береһендә** бер нәмә тураһында әйләнгән һайын ҡабатлап һөйләгәндә әйтелә. *Аллаяр ауыл буйлап, ике һүҙҙең береһендә: «Хәйерсегә ҡалабыҙ. Бөтәбеҙ»,— тип һөйләп йөрөй.* Ф. Иҫәнғолов. **Иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ** *ҡар.* **ауыҙ.** **Ҡара һүҙ** 1) халыҡ ижадындағы сәсмә әҫәр. *Башҡорт фольклор әҫәрҙәре боронораҡ әҙәби төр яғынан .. икегә айырып йөрөтөлгән .. Көйгә һалынмай, һөйләү ҡалыбында булғаны «ҡара һүҙ» тип йөрөтөлгән.* Ғ. Амантай; 2) *диал.* Әкиәт. *Ҡара һүҙ һөйләү боронғо заманда ҡышҡы төндәрҙең биҙәге була торғайны.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ. **Ҡырҡ** (*йәки* **оло**) **һүҙгә етеү** буш сәбәпте ҙур итеп һөйләнеү. *Майгөл әбей .. бәләкәй генә нәмә өсөн ҡырҡ һүҙгә етә, нәҫел-нәсәбеңде ҡалдырмай, тетеп ташлай.* К. Мәргән. **Һүҙгә килешеү** әрләшеү. *Мозафар Сабира апай менән бик ҡаты һүҙгә килешкәс, былтыр йәй ғаиләһен дә, ауылды ла бөтөнләй ташлап сығып киткән.* Ф. Иҫәнғолов. **Үҙ һүҙле** әйткәненән, үҙ фекеренән сигенмәгән. *Әйе, Янов үҙ һүҙле .. Бөтәһенә лө үҙ фекерен, үҙ ихтыярын көсләп таға.* Я. Вәлиев. **Һүҙ алдырмау** һөйләшергә ирек бирмәй мәшәҡәтләү. **Һүҙ асыу** башлап өндәшеү, һөйләй башлау. *Маян йүгереп ҡайтҡан, атаһына һүҙ асҡан: «Серең йәшереп балаңдан бойоғоп торма, атаҡай».* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». **Һүҙ беркетеү** һөйләшеп, бер фекергә килеү, килешеү. *Сауҙагәр улы .. ауыл егеттәренә һиҙҙермәҫтән, һылыубикәне бер кисте алып ҡасырға һүҙ беркетә* (Легенданан). **Һүҙҙе бирмәү** әйткәненде үтәргә, үҙеңсә эшләргә тырышыу. **Һүҙҙе йығыу** кешенең әйткәнен, үтенесен иҫәпкә алмау. **Һүҙҙе тотоу** әйткәнде тыңлау, әйткәнде үтәү. **Һүҙҙе һүҙ итеү** *йәки* **һүҙен итеү** үҙ фекереңде өҫкә сығарыу. **Һүҙҙән сыҡмау** әйткәнде тыңлап, килешелгәнсә эшләү. **Һүҙ ҙә юҡ** нимәнелер шиккә алмағанды белдерә; әлбиттә. **Һүҙ итеү** ғәйепкә һанап әйтеү. **Һүҙ килешеү** уртаҡ фекергә килеп, үҙ-ара аңлашыу. *Килешеп китте беҙҙең һүҙҙәр. Ат тураһында һөйләшәбеҙ.* Б. Бикбай. **Һүҙ көрәштереү** бәхәсләшеү, ирәгәләшеү. **Һүҙ күтәреү** үҙеңә әйткән шелтәне ҡабул итеү. *Берәүҙәр тәнҡит итеп, тура әйткән һүҙҙе күтәрмәй.* М. Тажи. **Һүҙ ҡатнаштырыу** һөйләшеүселәр араһына ҡыҫылып, үҙ фекереңде әйтеү. **Һүҙ ҡатыу** өндәшеү, нимәлер әйтеү. *Йылы һүҙ ҡатыу.* **Һүҙ ҡуҙғатыу** нимә хаҡындалыр һөйләшә башлау. *Ҡайһы берәүҙәр кире*

*кайтыу тураһында һүҙ ҡуҙғата башлаған.* Р. Ниғмәти. **Һүҙ ҡушыу** һөйләшә башлау, өндәшеү. *Бер уҡытыусы Сәғиҙәгә яҡыныраҡ килеп һүҙ ҡушты.* М. Тажи. **Һүҙ тейеү** шелтә итешеү. **Һүҙ төйнәү** үҙ-ара килешеп, һөйләшеүҙе тамамлау. *Мәүләтбай ағай менән мөслихәтләшеп, бер төрлө һүҙ төйнәгәйнек инде.* Ғ. Дәүләтшин. **Һүҙ тыңлау** әйткәнде ҡаршылыҡһыҙ үтәү, әйткәнсә эшләү. **Һүҙ уйнатыу** әйтелеше бер булған төрлө мәғәнәле һүҙҙәрҙе бергә килтереп һөйләү. **Һүҙ үтеү** һөйләшкәндә фекерең өҫтөн булыу. **Һүҙ әйәрә һүҙ китеү** һөйләшеүҙе, хәбәрҙе оҙаҡҡа дауам итеү. **Һүҙ әйтеү** *кар.* **әйтеү** [1].

● *Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ.* Әйтем. *Ил һүҙе — диңгеҙ тулҡыны.* Мәҡәл. *Йылы һүҙ таш иретә.* Әйтем. *Кеше һүҙе кеше үлтерә.* Әйтем. *Кеше ышанмаҫ һүҙҙе ысын булһа ла һөйләмә.* Әйтем. *Көндө ел боҙор, кешене һүҙ боҙор.* Мәҡәл. *Оло һүҙен тыңламаған оролған да бәрелгән.* Мәҡәл. *Һүҙ башы мәҡәлдә.* Әйтем. *Яҡшы һүҙ йән аҙығы, яман һүҙ баш ҡаҙығы.* Мәҡәл. *Әйткән һүҙең көмөш булһа, тик тороуың алтын булыр.* Мәҡәл.

**ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШ** *и. лингв.* Мәғәнәүи һәм грамматик яҡтан үҙ-ара бәйләнештә булған һүҙҙәр ҡушылмаһы. **Инеш һүҙбәйләнеш** һөйләмдең башҡа киҫәктәре менән грамматик яҡтан бәйләнмәгән, һөйләмдә әйтелгән фекерҙә һөйләүсенең мөнәсәбәтен күрһәтеү йәки асыҡлау өсөн ҡулланылған һүҙбәйләнеш (һүҙ юҡ, дөрөҫөн әйткәндә).

**ҺҮҘЛЕК** *и.* **1.** Һүҙҙәрҙе мәғәнәләре аңлатылып йәки икенсе телгә тәржемә ителеп билдәле бер тәртиптә, алфавитта теҙеп төҙөлгән китап. *Башҡорт-рус һүҙлеге. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге.*

**2.** Кемдер тарафынан йәки ниндәйҙер эш өлкәһендә ҡулланылған һүҙҙәр йыйылмаһы; лексика. *Уҡыусыларҙың актив һүҙлеге.*

**ҺҮҘЛӘҮ** *к. иҫк.* Һөйләү. *Ғәриптең күҙе күрмәҫ, һүҙләһә, һүҙе рәүә булмаҫ* (Мөнәжәттән).

**ҺҮҘЛӘШЕҮ** *к.* Ҡаршы әйтешеү, һүҙ көрәштереү, эреплэшеү. *Мин оҙаҡ уйлап торманым, артыҡ һүҙләшеүҙе лә тейеш тапманым.* М. Таһиров. *Сәсән йәшеренеп түгел, ил алдында һүҙләшер.* Б. Вәлит.

**ҺҮҘ-МАҘАР** *и. йыйн.* Төрлө һүҙҙәр, хәбәр. *Йыйылышта тәртип тураһында һүҙ-маҙар булманымы?* / Әр, шелтә һ. б. яман хәбәр, һүҙ. *Һүҙ-маҙар булыу.* ■ *[Фатима:] Ҡарлуғас, әйҙә ҡайтайыҡ инде .. үҙеңдән дә кеше көлмәһен беҙгә лә һүҙ-маҙар теймәһен.* Б. Бикбай.

**ҺҮҘМӘ-ҺҮҘ** *р.* Әйтелгән йәки яҙылғанды һис үҙгәртмәгән көйө. *Һүҙмә-һүҙ еткереү. Һүҙмә-һүҙ тәржемә итеү.*

**ҺҮҘСӘН** *с.* Һүҙгә әүәҫ, һөйләшергә яратҡан. *Һүҙсән' булыу.* ■ *Юлсы асыҡ йөҙлө, һүҙсән кеше булып сыҡты.* Д. Исламов.

**ҺҮҘСӘНЛӘНЕҮ** *к.* Һүҙсәнгә әйләнеү, һүҙсән булыу. *Инәйҙең яһап биргән һәр сынаяҡ сәйен эскән һайын кәйефләнә, һүҙсәнләнә барҙыҡ.* Х. Түләкәев.

**ҺҮҘҺЕҘ** *с.* Һүҙ өндәшмәҫ, ҡаршы һүҙ әйтмәҫ. *Һүҙһеҙ кеше. Һүҙһеҙ булыу. Һүҙһеҙ итеү.* ■ *Бил бөктөрөп, ҡол яһар ул ҡарт әсәңде, телен ҡырҡып, һүҙһеҙ итер бар сәсәнде.* Р. Ниғмәти. *Аша ған ваҡытта һүҙһеҙ ултыра торған Индрил һүҙгә килде.* Д. Юлтый.

♦ **Бер** (*йәки* **һис**) **һүҙһеҙ** 1) уйлап тормай, икеләнмәй. *Мин уны бер һүҙһеҙ шундай эшкә ҡуйыр инем.* Һ. Дәүләтшина; 2) шикһеҙ.

**ҺҮҘЪЯҺАЛЫШ** *и. лингв.* Тел ғилеменең һүҙ торған фән. *Семантик һүҙъяһалыш. Синтаксик һүҙъяһалыш. Морфологик һүҙъяһалыш.*

**ҺҮЖӘ** *ымл.* Күмәк эштә (бесән иген һ. б.) кешеләрҙе ҡеүәтләп, дәртләндереп әйткән һүҙ.

**ҺҮЖӘЛӘҮ** *к.* Эште ҡеүәтләү, дәртләндереп ҡыҫҡырыу. **Һүжәләп ятабыҙ** һүжә тип ҡеүәтләгәнгә яуап һүҙе.

**ҺҮКТЕРЕҮ** *к. йөкм. кар.* **һүгеү**. *Кешенән һүктереү.*

**ҺҮКӘТ** *с. диал.* Әҙмәүер. *Һүкәт бала. Һүкәттәй булыу.*

**ҺҮЛ** *и.* **1.** Иттән һарҡҡан ҡан ҡатыш шыйыҡлыҡ. *Иттең һүле. Иттең һүле ағыу.*

**2.** *диал.* Төрлө нәмәгә һеңгән дым. *Һүлле бесән.*

**ҺҮЛДЕР** *с. диал. кар.* **һүрән 1.** *Һүлдер мунса.*

**ҺҮЛПӘН** *с.* **1.** Эштә, хәрәкәттә ауыр, яй ҡуҙғалыусан, дәртһеҙ эшләгән. *Һүлпән кеше.* ■ *Һуғыш осоронда кешеләр бик үҙгәрҙе. Әлек һүлпәнерәк булғандар егәрләнеп китте.* С. Агиш.

**2.** Яй, дәртһеҙ башҡарышлы. *Һүлпән эш. Һүлпән аҙым. // Һүлпән атлау. Һүлпән ҡуҙғалыу. Һүлпән эшләү.* ■ *Шул көндән алып Ишбулдиндың йөрөшө һәм бөтә хәрәкәте һүлпәнгә әйләнгән.* Ә. Вәли. *Еле лә, ҡаты буран сығарыуға әҙерләнеп көс йыйғандай, һүлпән генә иҫә.* Ғ. Ғүмәр.

**3.** Йомшаҡ сиратылған, бушаҡ ишелгән (еп, йөн һ. б. ҡарата). *Һүлпән арҡан.*

**ҺҮЛПӘНЛЕК** *и.* Эштә, хәрәкәттә булған әкренлек, яйлыҡ, һалмаҡлыҡ. *Һүлпәнлек менән.* ■ *[Хафиз:] Давай, эште тиҙләтәйек әле, бесән эше һүлпәнлекте һөймәй, көндәр аяҙ саҡта бөтөрәйек.* Ҡ. Даян.

**ҺҮЛПӘНЛӘНЕҮ** *к. кар.* **һүлпәнәйеү**.

**ҺҮЛПӘНӘЙЕҮ** *к.* **1.** Һүлпән (2 мәғ.) булыу, һүлпәнгә әйләнеү. *Бесәндә эштәр бик һүлпәнәйеп китмәһен.*

**2.** Баҫынҡы, әкренгә әйләнеү; баҫынҡы булыу. *Ҡайҙалыр яҡында ғына гөпөлдәгән движоктың тауышы һүлпәнәйеп тора ла, тағы көсәйә.* Ә. Вәли.

**ҺҮЛПӘНӘЙТЕҮ** *к.* Һүлпән (2 мәғ.) итеү, һүлпәнгә әйләндереү. *Эште һүлпәнәйтеү. Ит ҡайнап сыҡҡас, утты һүлпәнәйтегеҙ.*

**ҺҮЛӘ** *и. диал. кар.* **күбә** [1]. *Ос һәнәгеҫ ҡулға үҙем тотоп, ырғытырмын тотош һүләне.* Р. Ғарипов.

**ҺҮЛӘМ: һүләм юл** *диал.* Һүрәпән юл (*кар.* **һүрәпән**).

**ҺҮМЕС** *и. диал.* Сүмес.

**ҺҮНДЕРГЕС** *и.* Ут һүндерә торған ҡорамал. *Ул Азаматов .. стенала эленеп торған .. «Богатырь» маркалы иҫке ут һүндергестән башҡа бер нәмә лә күрмәне.* Ә. Вәли. **Күмер һүндергес**

ҡуҙҙы һүндереп ҡуйыу өсөн эшләнгән көплө тимер һауыт.

**ҺҮНДЕРЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **һүндереү.** *Һүндерелгән ут.*

**ҺҮНДЕРЕҮ** *к.* **1.** Яныуҙан, яҡтыртыуҙан туҡтатыу. *Шәмде һүндереү. Тәмәкене һүндереү.* ■ *Утты башҡа өйҙәргә ебәрмәнеләр, һүндерҙеләр.* Ғ. Хәйри./ Эшләүҙән туҡтатыу (машина, механизмды). *Моторҙы һүндереү.* ■ *Ғәбит ағай ҙа тракторын һүндереп, йылға буйына төшөп китте.* Ф. Исәнғолов.

**2.** *күсм.* Эске хис-кисереште юҡ итеү. *Дәртте һүндереү.* ■ *Халыҡҡа булған һөйөүҙе һис бер көс һүндерә алмаç.* М. Хәй.

**ҺҮНДЕРТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **һүндереү.** *Утты һүндертеү.*

**ҺҮНЕК** *с. һөйл.* Янмаған, һүндереүле. *Шәме һүнек өй. Өйҙәренең уты һүнек.*

**ҺҮНЕҮ** *к.* **1.** Яныуҙан, яҡтыртыуҙан туҡтау. *Йондоҙ һүнә. Мейес һүнә. Ут һүнә. Шәм һүнә.* ■ *Ҡуҙ һүнһә лә, усаҡтарҙа көл ҡалған; күҙ йәшенән күлдә шытҡан гөл ҡалған.* М. Кәрим. *Төн уртаһы. Леп-леп һүнә тәҙрәләр берәм-берәм.* Н. Нәжми.

**2.** *күсм.* Юҡҡа сығыу, бөтөү (хис-кисерешкә ҡарата). *Мөхәббәт һүнә. Өмөт һүнә.* ■ *«Иçте елдәр, күсте ҡомдар...», бөттө дарман, һүнде дәрт.* Ш. Бабич.

**3.** *күсм.* Эшмәкәрлек көсө бөтөп, һүлпәнләнеү; һүрелеү. *Ижад һүнә. Фекер һүнә.* ■ *Мин башлаған эш, үҙем шикелле, ваҡытһыҙ һүнеп ҡалмаһын ине.* Ә. Вахитов./ Яңғырауҙан туҡтау. *Ары киткән һайын йыр тауышы әкренәйҙе. Бара-бара бөтөнләй һүнде.* Һ. Дәүләтшина.

**ҺҮНМӘÇ** *с.* **1.** Мәңге янасаҡ, һүнеүҙе белмәç. *Йоҡла һин, иркәм, йом һин, йом күҙең, минең аҡҡошом, һүнмәс йондоҙом.* М. Хәй.

**2.** *күсм.* Мәңге бөтмәç, һүрелмәç. *Һүнмәç мөхәббәт. Һүнмәç йөрәк.*

**ҺҮРЕЛДЕРЕҮ** *к. ҡар.* **һүрелтеү.**

**ҺҮРЕЛЕҮ** [1] *к.* **1.** Ялҡынлап, баҙлап янған хәлдән ҡайтып, көсө кәмеү, әҙәйеү, һүнергә яҡынлау. *Ҡуҙ һүрелә.* ■ *Хисмәтулла һүрелеп барған утҡа утын өçтәп яҡты.* Я. Хамматов. / Булған эçелектән ҡайтып, һыуырға яҡынлау. *Мейес һүрелә. Мунса һүрелә.* ■ *Инде был ваҡытта төш ауып, йәйге селләнең эçеһе һүрелә башлаған ине.* Ш. Шәһәр.

**2.** *күсм.* Ныҡ көсәйгән йәки ҡыҙған хәлдән баçылыу, һүлпәнәйеү. *Дәрт һүрелә. Асыу һүрелә.* ■ *[Мәҙинә:] Әсәйем асыулана ла, тиҙ генә һүрелә ул.* Ш. Янбаев. *Малайҙарҙың уйындары һыуынмай ҙа һүрелмәй.* С. Кулибай.

**3.** *күсм.* Яҡынлыҡ хисен юғалтып, һыуыныу. *Ашыҡ-бөшөҡ тапҡан дуçтарымдан һүрелдем мин.* Р. Бикбаев. *Әйләнеп тә ҡарамайым бер күнелем һүрелгәс* (Халыҡ йырынан).

**ҺҮРЕЛЕҮ** [2] *к. төш. ҡар.* **һүреү** [2]. *Һүрелгән еп. Һүрелгән ойоҡ.*

**ҺҮРЕЛТЕҮ** *к.* **1.** Ялҡынланып, баҙлап торған хәлдән ҡайтарыу. *Утты һүрелтеү.*

**2.** *күсм.* Яҡынлыҡ хисен кәметеү, һыуындырыу. *Дәртте һүрелтеү. Күңелде һүрелтеү.*

**2.** *күсм.* Яҡынлыҡ хисен кәметеү, һыуындырыу. *Дәртте һүрелтеү. Күңелде һүрелтеү.*

**ҺҮРЕМ** *и. диал.* Һүренде.

**ҺҮРЕНДЕ** *и.* Туҡыманан һүреп алынған еп.

**ҺҮРЕҮ** [1] *к.* Булған көстән, теләктән, хистән ҡайтарыу; һүндереү. *Күңелде һүреү.* ■ *[Садрислам — Фәйзуллаға:] Шул әүен һүғыуҙан халыҡты кире һүреп булмаçмы икән?* Ф. Исәнғолов.

**ҺҮРЕҮ** [2] *к.* Туҡыманың, бәйләмдең ебен һүрыу, тағатыу. *Ойоҡто һүреү. Таçтамалдың осон һүреү.*

**ҺҮРЕҮ** [3] *и. диал.* Кәпрән.

**ҺҮРМӘ** *и. диал.* Сепрәк балаç.

**ҺҮРМӘКӘЙ** *и. диал.* Һүрәпән юл.

**ҺҮРНӘКӘ** *и. диал.* Һүренде.

**ҺҮРӘМҺЕҮ** *к. диал. ҡар.* **һүрелеү** [1].

**ҺҮРӘН** *с.* **1.** Янып торошо һүлпән; янырянмаç. *Һүрән күҙ. Һүрән яныу.* ■ *Йәмилә ҡоймаҡты .. көйҙөрөп ташламаç өсөн уттың һүрәнерәк ерендә бешерә ине.* С. Агиш./ Эçелеге әҙ. *Һүрән мейес. Һүрән мунса.*

**2.** *күсм.* Дәрт-ҡеүәтһеҙ, һүлпән. *Һүрән тормош. Һүрән эш. Эш һүрән бара. Ҡыҙҙың күңеле һүрән.* ■ *Атай һүрән генә йылмайҙы ла, хәлһеҙ ҡулы менән ымланы.* Р. Бикбаев.

**ҺҮРӘНКЕ** *с.* Һүнеп барған, һүрелгән. *Һүрәнке булыу.*

**ҺҮРӘНКЕЛӘНЕҮ** *к. ҡар.* **һүрелеү** [1].

**ҺҮРӘНЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Һүрәнгә әйләндереү, һүрән итеү. *Мейесте һүрәнләндереү. Мунсаны һүрәнләндереү.*

**ҺҮРӘНЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Һүрәнгә әйләнеү, һүрән булыу; һүрелеү. *Ут һүрәнләнә. Ҡуҙ һүрәнләнә.*/ Эçе хәлдән ҡайтыу; һүрелеү. *Һауа көндөҙгөнән байтаҡ һүрәнләнеп, һулап туйғыһыҙ булған.* Ҡ. Ибәтуллин.

**2.** *күсм.* Көс-ҡеүәттән, ҡыҙыулыҡтан ҡайтыу, ҡайтышҡа әйләнеү; һүрелеү. *Эш һүрәнләнде.* ■ *Иртәнән ҡара ҡискә тиклем барған һый һүрәнләнде.* Т. Хәйбуллин.

**ҺҮРӘНЛӘТЕҮ** *к.* **1.** Һүрәнгә әйләндереү, һүрән итеү; һүрәнәйтеү. *Утты һүрәнләтеү.*

**2.** *күсм.* Һүлпән (1 мәғ.) итеү, баçылдырыу. *Эште һүрәнләтеү.*

**ҺҮРӘНҺЕҮ** *с.* Һүрәнәйә төшкән, бер аҙ һүрән. *Һүрәнһеү ут.*

**ҺҮРӘНӘЙЕҮ** *к.* **1.** Һүрәнгә әйләнеү; һүрән булыу; һүрелеү. *Ут берсә көсәйеп балҡый, берсә һүнергә етешеп, һүрәнәйә.* Ә. Вәли./ Эçелеге бөтә барып, һыуый башлау; һүрелеү. *Киң даланың көндөҙгө эçелеге һүрәнәйҙе, тын алырға иркенерәк булып китте.* А. Таһиров.

**2.** *күсм.* Булған көс-ҡеүәттән, ҡыҙыулыҡтан ҡайтыу; һүрелеү. *Эш һүрәнәйә.* ■ *[Гөлзифа:] Ниндәйҙер шом борсой мине һаман, күңелем гүйә һүрәнәйә бара.* М. Кәрим.

**ҺҮРӘНӘЙТЕҮ** *к.* Һүрәнгә әйләндереү, һүрән итеү. *Утты һүрәнәйтеү. Эште һүрәнәйтеү.*

**ҺҮРӘПӘН:** **һүрәпән юл** үлән баçып бөтөп барған иçке һуҡмаҡ. .. *Оло һырт буйлап бер һүрәпән юл утә. Уны «Ҡуңыр буға» юлы тип йөрөтәләр.* М. Ҡотлоғәлләмов.

**ҺҮРӘТ** [*гәр.*] *и.* **1.** Ниҙеңдер төç-килбәтен, рәүеш-булмышын сағылдырып, ҡулдан яһаған күсермә, рәсем. *Кеше һүрәте. Ат һүрәте. Өй һүрәте. Һүрәт төшөрөү.* ■ *Шәригәт буйынса,*

*мосолман кешегә ерҙә йәшәгән йән эйәһенең һүрәтен яһарға ярамай.* М. Кәрим./ Оптик аппарат ярҙамында яһалған күсермә. *Һүрәткә төшөү.*

**2.** Ниҙәндер уй-хыялдағы сағылышы. *Шыжлап өргән ел дә йөрәкте тырнап, аҡтарып алырға һуҙылған ҡыу ҡулдарҙың һүрәтен күҙ алдына килтерә.* Т. Хәйбуллин.

**3.** Ниҙәндер тышҡы рәүеш-килбәте, ҡиәфәт. *[Теге ҡыҙ:] «Мин әбей ҙә була алам, теләгән бер нәмә һүрәтенә инә алам»,— тигән* (Әкиәттән).

**ҺҮРӘТЛЕ** *с.* Һүрәттәр (1 мәғ.) менән биҙәлгән, һүрәт төшөрөлгән. *Һүрәтле китап.* ■ *Көҙгө эсендә ҡара бәрхәт кәзәкейенең балыҡ һүрәтле көмөш ҡаптырмалары ялтырап .. Ныяҙголултыра.* Һ. Дәүләтшина.

**ҺҮРӘТЛӘМӘ** *и.* Тормошта булған хәл, ваҡиға, кеше тураһында автор үҙе күреп белгәндәренә таянып яҙған бәләкәй әҙәби әҫәр. *Һүрәтләмә яҙыу.*

**ҺҮРӘТЛӘНДЕРЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **һүрәтләнеү**. *Салауат халыҡ музыкаһында ла шулай рухи етәксе итеп һүрәтләндерелгән.* Ә. Харисов.

**ҺҮРӘТЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Ниҙелер уй-хыялда сағылдырыу. *Шуларҙы (корбандарҙы) бына бөгөн төш һымаҡ күҙ алдынан һүрәтләндереп үҙгәрһәң, эсең бошоп, йөрәгәң алҡымыңа килә.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *ҡар.* **һүрәтләү**.

**ҺҮРӘТЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **һүрәтләү**. *Әҫәрҙә һүрәтләнгән ваҡиға.*

**2.** Һүрәт рәүешендә сағылыу, һүрәт рәүешендә булыу. *Көҙгөлә бик күңелһеҙ күренеш һүрәтләнеп тора, ти* (Әкиәттән).

**ҺҮРӘТЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Һүрәт рәүешенә килтереп сағылдырыу, һүрәт итеп төшөрөү. *Мәрхүмәнең түшендә бронза сылбыр менән .. ат башын һүрәтләгән бер бронза һырға табылды.* Н. Мәжитов.

**2.** Художестволы формала тасуирлау, күрһәтеү (әҙәбиәттә, сәнғәттә һ. б.). *Тарихты һүрәтләү. Тормошто һүрәтләү. Тәбиғәтте һүрәтләү.* ■ *«Серле һуҡмаҡ» Шиһап Шәһәрҙен берҙән бер ҙур күләмле әҫәре .. Был роман Башҡортостандың алыҫ үткәнен һүрәтләй.* Ә. Вахитов.

**ҺҮРӘТСЕ** *и.* Һүрәт төшөрөүсе; рәссам.

**ҺҮРӘҮ** *с. диал.* Һүрән. *Һүрәү ат. Һүрәү булыу.*

**ҺҮРӘҮЛӘНЕҮ** *ҡ. диал.* Һүрәнләнеү. *Төшләктән ауышҡан ҡояш та .. арыған төҫлө һүрәүләнде.* Ш. Янбаев.

**ҺҮҪЕЛЕҮ** *ҡ.* Нимәлер буйҙан-буйға оҙон булып һүтелеү, һүрелеү./ Йыртылыу. *Һүҫелеп сығыу.*

**ҺҮТЕК** *с.* Һүтелгән. *Кейемдең һүтек ере.* // *Нәғимә ағаһының пинжәк һүтектәрен тегә ине.* И. Насыри.

**ҺҮТЕЛЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **һүтеү**. *Һүтелгән ҡулдәк.*

**2.** Һүтек хәлгә килеү, һүтек булыу. *Аяҡтарҙа итек бөттө, өҫтә шинель һүтелгән* (Бәйеттән).

**ҺҮТЕҮ** *ҡ.* **1.** Тегелгән, ишелгән, уралған нәмәне тағатыу. *Йомғаҡты һүтеү. Күлмәктең яғаһын һүтеү. Арҡанды һүтеү.* ■ *Аҙнағол Зөлхизәнең тулҡынланып торған оҙон, ҡалын толомдарын һүтеп тарата.* З. Биишева.

**2.** Ҡороп, яһап ҡуйған нәмәне таратыу, боҙоу. *Өйҙө һүтеү. Ҡойманы һүтеү. Һалды һүтеү.* ■ *Ә мәсетте һүтеп мәктәп иттек, арғы осҡа клуб ҡутәрҙек.* Ғ. Амантай.

**3.** *күсм. һөйл.* Ҙур күләмдә, күп итеп баш ҡарыу; тетеү. *Эште һүтеү. Йоҡоно һүтеү.* ■ *Иртәнсәкәй тороп мин ҡараһам, һарысай түрғай һүтә уйынды* (Халыҡ йырынан).

**4.** *күсм. һөйл.* Ныҡ туҡмау. *Һүтеп һалып ҡуйыу.*

**ҺҮТЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **һүтеү** 1, 2.

**ҺҮТТЕРЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **һүтеү** 1, 2, 4.

**ҺЫ** *ымл.* **1.** Кешенең һүҙен иғтибарға алғанды белдерә.

**2.** Кешенең һүҙенә кире мөнәсәбәт белдергәндә әйтелә.

**ҺЫБАЙ** *с.* **1.** Атҡа менгән, атҡа атланған. *Һыбай кеше.* // *Бер һыбай йәнфарман сабып килә.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *р. мәғ.* Ат менгән рәүештә. *Һыбай йөрөү. Һыбай сабыу.* ■ *Ашарлыҡ игенде улар [Баҡый һалҡы] .. йомро юл менән һыбай артып ташыған.* Ж. Кейекбаев.

● *Һыбайға юл күп.* Әйтем. *Һыбай егет юл һорашмаҫ.* Мәҡәл.

**ҺЫБАЙЛАНЫУ** *ҡ.* Һыбай менеү. *Ҡуҙыйкүрпәс тuғыҙ йыл тыу йөрөгән бейәне һә тигәнсе тотоп алып, һыбайланып алды ла, саба-саба манма тиргә төшөрҙө, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҺЫБАЙЛАУ** *ҡ.* Ат менеү. *Һыбайлап килеү.*

**ҺЫБАЙЛЫ** *с.* Ат менгән; һыбай. *Һыбайлы егет. Һыбайлы булыу.* ■ *Ул арала һыбайлы кеше ҡыуыш янына килеп тә етте.* М. Тажи. // *Һыбайлылар ишек алдына килеп, аттарынан төштө.* Ж. Кейекбаев.

**ҺЫБАЙСА** *и. диал.* Менге ат.

**ҺЫБАЙСЫ** *и.* Һыбай йөрөүсе. *Оҫта һыбайсы.* ■ *Халыҡ йырында уның [Салауаттың] ун дүрт йәштә уҡ батыр булыуы, оҫта һыбайсы булыуы, ҡорал менән бик оҫта эш итә белеүе тураһында әйтелә.* Ә. Харисов.

**ҺЫБАУ** *с. диал. ҡар.* **һыуһыл** 2.

**ҺЫБАШҠАҠ** *с. диал.* Һылашҡаҡ. *Һыбашҡаҡ ҡар.*

**ҺЫБАШҠЫ** *и. шул уҡ* **елем үлән** (*ҡар.* **үлән**).

**ҺЫБАШЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **һылашыу** 2.

**ҺЫБЫҘҒЫ** *и.* **1.** Ауыҙға ҡабып уйнай торған ҡыҫҡа ағас көпшә рәүешендәге бер нисә тишекле музыка ҡоралы. *Һыбыҙғы тауышы. Һыбыҙғы уйнау. Һыбыҙғы яһау.* ■ *Юғары оста сыбыртҡы шартлауы, мөгөҙ һыбыҙғы тауышы, һыйырҙар мөңрәүе, һарыҡтар баҡырыуы ишетелә.* И. Көҫәпҡол.

**2.** *диал.* Һыҙғыртҡыс.

**ҺЫҒЫЛДЫРЫУ** *ҡ.* Һығылған [1], бөгөлгән хәлгә килтереү. *Һығылдыра баҫыу.* ■ *Егеттәр ер билен һығылдырып, үҙ-ара көрәш аҫкандар.* Ә. Вахитов.

**ҺЫҒЫЛМА** *с.* Һығылып, бөгөлөп торған. *Күҙ асып, күҙ йомған арала һығылма бил Сәлимә алға килеп баҫҡан һымаҡ булды.* З. Биишева.

**ҺЫҒЫЛМАЛЫ** *с.* Еңел генә бөгөлөп, һығылып торған. *Һығылмалы ҡырандас. Һығылмалы баҫма.* ■ *Алмағастың һығылмалы ботағына ҡунып, һайрай ине таңда һандуғас.* Ғ. Әмири.

**ҺЫҒЫЛМАЛЫҠ** *и.* Еңел һығыла торған сифат. *Ҡоростоң һығылмалығы.*

**ҺЫҒЫЛЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Көс тәьҫирендә эйелеп кәкере хәлгә килеү; бөгөлөү. *Һығылып тороу.* ■ *Ағастарға йәбешеп ҡараным: ҡоро ағас ботаҡтары һынды, йәш ағастар мине тота алмай һығылды.* Б. Ишемғол. *Шоссе юлдары һығыла ылауҙар үткән саҡта.* Ш. Бикҡол./ Билдән эйелеү; бөгөлөү. *Ҡыҙҙар юхаланып, наҙланып, һығылып йөрөй ине үҙҙәре.* Ш. Бабич.

**2.** *күсм. һөйл.* Ауырлыҡҡа, ҡайғыға бирешеү. *Шәһиҙә — героик шәхес. Ирен, улын юғалтып, ҡайғыһынан һығылып төшмәй.* М. Минһажетдинов.

**ҺЫҒЫЛЫУ** [2] *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **һығыу** [2]. *Бәй менән һығылған бәләк. Шул саҡ ике аяғы ла һирмәнең әлмәгенә ҡуша һығылған һыйыр .. күҙ алдыма килде.* Н. Мусин.

**2.** Ҡыҫылып һарҡыу. *Һығылып сығыу.* ■ *Йүкәләрҙән һығылып бал тама!* Р. Бикбаев.

♦ **Һығылып илау** ныҡ әрнеп, күҙ йәшен түгеп илау. *Гөлйөҙөм уның ҡосағында өнһөҙ һығылып иланы.* Һ. Дәүләтшина.

**ҺЫҒЫМСА** *и.* Махсус ireткес ярҙамында үҫемлектәрҙән һ. б. иретеп, һығып алған матдә.

**ҺЫҒЫМТА** *и.* Уйлап, фекер йөрөтөп, сағыштырыу нәтижәһендә барлыҡҡа килгән дөйөм фекер; йомғаҡ. *Һығымтаға килеү. Һығымта яһау. Һығымта сығарыу.* ■ *Ҡатындарҙың һөйләгәненән дә, үҙ күҙе күргәненән дә Тимер Янһаров бер ниндәй һығымтаға килә алманы.* Б. Бикбай.

**ҺЫҒЫНДЫ** *и.* Ниҙәндер һутын һыҡҡандан һуңғы ҡалдығы. *Алма һығындыһы. Сөгөлдөр һығындыһы.*

**ҺЫҒЫНЫУ** *ҡ.* **1.** Өҫ кейемдәреңдең һыуын һығыу. *Һығынып алыу.*

**2.** Ныҡ яҡын килеп, ҡыҫыла килеп терәлеү; һырыныу, һыйыныу. *Һығынып ултырыу.*

**3.** Ышыҡ эҙләп, ярҙам теләп һырлығыу; һыйыныу. *Ҡол булып торған төрлө милләт кешеләре коллоктан ҡасып, Башҡортостанға килеп һығына.* Ғ. Фәхретдинов./ Йөҙ ороу, табыныу. *Ул ваҡытта тиҙ генә аллаhы иҫкә төшөрәһең, иҫтә ҡалған бөтә доғаларҙы уҡып, уға һығынаһың.* Һ. Дәүләтшина.

**ҺЫҒЫТ** *с. диал.* Һыҡмыр.

**ҺЫҒЫУ** [1] (һыҡ*ғ*) *ҡ.* **1.** Көс менән түбән эйеп кәкере хәлгә килтереү; бөгөү. *Таҡтаны һыға баҫыу.* ■ *Ырҙынға өйгән эҫкерттәр һығалар ерҙен билен.* Р. Ниғмәти.

**2.** *күсм.* Ғазап-яфа менән бирештереү; бөгөү. *Һуғып алыу.*

**ҺЫҒЫУ** [2] (һыҡ*ғ*) *ҡ.* **1.** Уратып, ҡыҫа тартыу; быуыу. *Муйынды һығыу. Һығып ҡосаҡлау.* ■ *Биленән һыға бәйләп, батшаны ҡотоҡ эсенә төшөрә лә, егет ҡайтып китә, ти* (Әкиәттән).

**2.** Ҡыҫып һарҡытыу. *Һығып сығарыу.* ■ *Сәскәләр ойоп ултыра татлы бал һығып.* Р. Назаров.

**3.** Бороп, ҡыҫып, һыуын һарҡытыу. *Керҙе һығыу.* ■ *Зөлкәрнәй оҙон ҡамыллы, тулы башаҡлы бойҙайҙарҙы көсәнеп тарта-тарта манма һыуға батты. Уның күлдәктәре һығып алмалы булды.* Ғ. Дәүләтшин.

**4.** *күсм. һөйл.* Көс-хәйлә менән йолоу. *Аҡсаһын һығып алыу.* ■ *Өйрәнсек һәр көршәктән биш хаҡ һығып сығарыуға өлгәшә.* З. Биишева.

● **Йөрәк майын һығыу** әрнеү, әсенеү. *Атай кеше .. йөрәк майын һығып иланы.* С. Агиш. **Йән тирҙе һығыу** ныҡ хәлде алыу, хәлдән тайҙырыу. *[Ҡарт:] Юлы таулы, соҡорло-саҡырлы. Ҡайта-ҡайта аттың йән тирен һыға торғайны.* М. Тажи.

**ҺЫҘА** *и.* **1.** Һөҙәк тау битләүе буйлап һуҙылған ялан. *Һыҙа буйлап барыу.* ■ *Баһау үлән баҫып бөткән иҫке арба юлы менән һыҙа башына менеп китте.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Тигеҙ ерҙәге оҙон соҡор; уй.

**ҺЫҘАҒАЙЫМ** *и.* Оҙон, буйынан-буйына һуҙылған ағаслыҡ. *Оҙон тирәктәр һыҙағайымы араһынан Дим йылғаһы күренер-күренмәҫ йылтырап ҡала.* Ғ. Хөсәйенов.

**ҺЫҘАҠ** *с.* Һыҙыҡ һымаҡ тар. *Һыҙаҡ ек.* // *Ишекте һыҙаҡ ҡына асыу.*

**ҺЫҘАТ** *и.* **1.** Оҙонға һуҙылған тар буй. *Бригадирҙың маңлайында ике һыҙат яға уйылып.* Б. Бикбай. **Урман һыҙаты** оҙон буй итеп ултыртылған ағаслыҡ.

**2.** Кемдең йәки ниҙеңдер килеш-килбәтен, һүрәтен тәшкил иткән төрлө билдә. *Туңкәрелгән янға окшап ята Мағаш тауҙың тышҡы һыҙаты.* Р. Ниғмәти.

**3.** *күсм.* Кемдең йәки ниҙеңдер сифатына хас булған билдә. *Ул [уҡытыусы] тәртипһеҙ уҡыусының да ыңғай һыҙаттарын күрә белә.* «Совет Башҡортостаны», 1964, 23 ғинуар.

**ҺЫҘАТЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **һыҙатлау.** *Һыҙатланған таҡта.*

**2.** Һыҙат (1 мәғ.) рәүешенә килеү, һыҙат булыу. *Ул [Зыя] .. ҡарашын бер нөктәгә терәгән, маңлайында беленер- беленмәҫ кенә йыйырсыҡтар һыҙатланған.* М. Тажи. *Алыҫ офоҡ ситендә таң һарыһы саҡ ҡына һыҙатлана башлаған.* Ә. Хәкимов.

**3.** *күсм.* Ниндәйҙер бер төрлө сифат йәки рәүешкә килеү. *Үтеләсәк юл ауыр ҙа, мауыҡтырғыс та булып һыҙатланды Гәүһәргә.* И. Ғиззәтуллин.

**ҺЫҘАТЛАУ** *ҡ.* **1.** Һыҙатлы итеү, Һыҙат һыҙыу. *Һыҙатлап ҡуйыу.* ■ *Штукатурсы кәрниз буйҙарын, түбә таҡталарын һыҙатлап, семәрләп сыға.* З. Биишева.

**2.** *күсм.* Ниҙеңдер бер төрлө сифат йәки рәүешен күрһәтеү. *Быны ул [Кадир] башҡа һүҙ юҡлыҡтан ғына әйттеме, постелдең ҡупшы йыйыштырылғанын һыҙатларға теләнеме — уныһын асыҡламаны.* Б. Бикбай.

**ҺЫҘАТЛЫ** *с.* Һыҙат булып торған, һыҙаты бар, буйлы. *Суғым ҡойроғо ергә тейеп торған, һырты буйынан-буйына ҡара һыҙатлы айғыр булған* (Әкиәттән).

**ҺЫҘҒАҠ** *с.* Һыҙып һыуыҡ булып иҫкән; ыҙғар, һыҙғырт. *Һыҙғаҡ ел. Һыҙғаҡ һыуыҡ.*

**ҺЫҘҒАНЫУ** *к.* Итәк-ең, балаҡ, сабыуҙы йыйып күтәреү; түрөү. *Салбар балағын һыҙғаныу.* ■ *Кәримә апай күлдәк сабыуын бөрмәһенә ҡыҫтырып, еңдәрен һыҙғанды.* Ш. Насыров. *Атаҡайым утын ваталыр, ал итәкәйҙәрен һыҙғанып* (Сеңләүҙән).

**ҺЫҘҒЫ** *и.* **1.** Ике бүрәнә йәки ике таҡта араһын тигеҙ ырыу өсөн үлсәү булып хеҙмәт иткән ҡорамал.

**2.** Ағасты семәрләй, ыра торған ҡорал.

**ҺЫҘҒЫРСЫҠ** *и. диал. ҡар.* **һыҙлыҡ** [1].

**ҺЫҘҒЫРТ** *с. ҡар.* **һыҙғаҡ**. *Урман эсенә килеп ингәс тә өҙөлмәне яландағы һыҙғырт ел. Асыҡ ерҙәге ише үтәнән-үтә һукмаһа ла, ең остарынан, салғый аҫтарынан .. өрә бирҙе.* Т. Килмөхәмәтов.

**ҺЫҘҒЫРТҠЫС** *и.* Өрөп һыҙғырта торған нәмә. *Балалар һыҙғыртҡысы. Милиционер һыҙғыртҡысы. Һыҙғыртҡыс һыҙғыртыу.*

**ҺЫҘҒЫРТМАҠ** *и. диал.* Һыҙғыртҡыс.

**ҺЫҘҒЫРТЫУ** [1] *к.* Һыҙғырған тауыш сығартыу. *Һыҙғыртҡысты һыҙғыртыу. Һыҙғыртып ҡарау.* ■ *Килеп төшөү менән таҙҙы һыҙғыртып ҡаранылар, ти. Таҙ бер һыҙғырғайны — ҡалалағы ҡоштар, ике һыҙғырғайны — бөтә батшалыҡтағы ҡоштар килеп йыйылды, ти* (Әкиәттән). **Һыҙғыртып уйнау** ҡурайҙы еңел генә өрөп уйнау. *Көйҙәрҙе өйрәнгәндә ҡурайсыға ҡурай тауышын һыҙғыртып ҡына уйнап өйрәнергә тәҡдим ителәә.* Ғ. Сөләймәнов.

**ҺЫҘҒЫРТЫУ** [2] *к.* Малдың эске (эсәк һ. б.) майҙарын ҡыҙҙырып иретеп туң май яһау. *Май һыҙғыртыу.*

**ҺЫҘҒЫРЫҠ** *и.* **1.** Һыҙғырғанда сыҡҡан тауыш. *Һыҙғырыҡ тауышы.*

**2.** *с. мәғ.* Һыҙғаҡ. *Бар тәнемде ҡапшай һыҙғырыҡ ел, һыуыҡ өтә ҡолаҡ, ҡулдарҙы.* С. Ғәбиҙуллин.

**ҺЫҘҒЫРЫНЫУ** *к.* Үҙ алдыңа һыҙғырыу. *Һыҙғырынып йөрөй.* ■ *Шофёр үҙ алдына ниндәйҙер көйгә һыҙғырынып, моторы эргәһендә соҡсона башланы.* Д. Исламов.

**ҺЫҘҒЫРЫУ** *к.* **1.** Теш, ирен араһынан өрөп тауыш сығарыу. *Әсе итеп һыҙғырыу.* ■ *Берәү ат эсәрә күл ярында, аты әсһен өсөн һыҙғыра.* Ғ. Хәйри. / Көй сығарып һыҙғырыу. *Тик ҡурай һыҙғырған сахра буйлап күтәрелгән яңы ҡалалар.* Ғ. Сәләм. *Яҙ миҙгелкәйҙәрен шунан беләм һыҙғырып та оса көйөлдө* (Халыҡ йырынан).

**2.** Әсе тауыш сығарыу (ел, буранға ҡарата). *Һепертмә ел генә әрем сыбыҡтарында һыҙғыра.* Ш. Янбаев. *Белоруссияның һығыш уты менән көйҙөрөлгән ерендә һырғаҡ буран әсе һыҙғыра.* Ә. Байрамов.

**3.** Ҙур тиҙлектә зыйлап хәрәкәт итеү. *Далала снарядтар шартланы, миналар иланы, пуляләр һыҙғырҙы.* Ә. Ихсан. *Уҡтар һыҙғырыуынан күк күкрәп торған.* Ә. Вахитов.

**ҺЫҘҒЫРЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **һыҙғырыу**. *Һыҙғырышып ел-дауылдар йөрөнө, ҡосоп алды тауҙы бер болот.* Н. Нәжми.

**ҺЫҘҒЫС** *и.* **1.** Скрипкаға ышҡып уйнай торған ҡыллы йәйә. *Борғолатып һыҙғысын, һыҙып күңелде өҙҙөрөр.* Ш. Бабич.

**2.** Ҡәләм менән туралап һыҙыу өсөн ҡулланылған төҙ йоҡа таҡта; линейка. *Һыҙғыс ҡуйып һыҙыу.*

**3.** *ҡар.* **һыҙғы**.

**4.** *диал. ҡар.* **шырпы** [1]

**ҺЫҘҒЫСЛЫ** *с.* Һыҙғыс (1 мәғ.) менән уйнала торған. *Һыҙғыслы музыка ҡоралдары.*

**ҺЫҘҘЫРТЫУ** *к.* **1.** *йөкм. ҡар.* **һыҙҙырыу** [1]. *Ҡаш һыҙҙыртҡан, ҡалын яҡҡан пудраһын, тик оноткан алғы тештәр ҡуйҙыраһын.* Ш. Бабич.

**2.** *ҡусм.* Көйҙө, йырҙы бик һәйбәт, оҫта итеп башҡарыу. *Һыҙҙыртып уйнау.* ■ *Ҡурайында егет һыҙҙыртҡанда моңло-зарлы оҙон көйҙәрен, гәжәп, көйгә кешеләр хайран ҡалып, килә башлай ташлап өйҙәрен.* Б. Вәлит.

**ҺЫҘҘЫРЫУ** [1] *к.* **1.** *йөкм. ҡар.* **һыҙыу** [1]. *Һыҙыҡ һыҙҙырыу.*

**2.** *ҡусм. ҡар.* **һыҙҙыртыу** 2. *Гармунда һыҙҙырыу. Ҡурайҙа һыҙҙырыу. Ашҡаҙар көйөн һыҙҙырыу.* ■ *Сәлмән бабай скрипкаһын алды ла һыҙҙырып уйнап ебәрҙе.* С. Агиш. *Моңлояр ҡумтанан еҙ ҡурайын һурып ала ла урғыпташып барған яңы көйҙө һыҙҙырып ебәрергә итә.* Й. Солтанов.

**ҺЫҘҘЫРЫУ** [2] *к. ҡар.* **һыҙғыртыу** [2]. *Май һыҙҙырыу.*

♦ **Йөрәк майын һыҙҙырыу** ныҡ әрнетеү, әсендереү. *Йөрәк майын һыҙҙырған гәрлек араны һыуындырҙы.* Ш. Янбаев.

**ҺЫҘЛАНДЫРЫУ** *к.* Һыҙланырға сәбәп биреү. *Ниңә мине һыҙландырып үтәһең яндан.* К. Кинйәбулатова.

**ҺЫҘЛАНЫУ** *к.* **1.** Тәндең һыҙлағанын кисереү. *Һыҙланып ятыу.* ■ *Бикбулат иртәгеһен һыҙланып торҙо, уның күкрәге тын алырға бирмәй ауырта ине.* С. Агиш.

**2.** *ҡусм.* Уйлап, борсолоп әрнеү; әсенеү. *Минут һайын күңелем халҡым менән, халҡым өсөн генә һыҙланам.* Т. Йәнәби.

**ҺЫҘЛАТЫУ** *к.* Һыҙларға сәбәп биреү. *Теште һыҙлатыу.*

**ҺЫҘЛАУ** [1] *к.* **1.** Тәнгә, үҙәккә үтеп, һыҙып ауыртыу. *Аяҡ һыҙлай. Быуын һыҙлай. Теш һыҙлай.* ■ *Матур уйҙар уйларға ирек бирмәй, беләк сатнап-сатнап һыҙлай.* Б. Ишемғол.

**2.** *ҡусм.* Ҡайғынан һ. б. әрнеү; әсенеү. *Күңел һыҙлай.* ■ *Тағы күңелем һүнеп, рухым төшә, һыҙлай йөрәк ҡанды киптереп.* Х. Ғәбитов.

● *Бала өсөн әсәнең йөрәге, атаның беләге һыҙлар.* Мәҡәл.

**ҺЫҘЛАУ** [2] *и.* Үҙәккә үтеп ауыртҡан хис.

♦ **Ҡоро һыҙлау** быуынды ҡурып, үҙәккә төшөп ауырттырған сир.

**ҺЫҘЛАУЛЫ** *с.* Һыҙландыра, һыҙлауға дусар итә торған. *Һыҙлаулы булыу.* ■ *[Мөхәмәтулла:] Ишек алды ташына ныгырак йығылдым шул. Шунан аҙаҡ беләк һыҙлаулы, ҡул бешәлекһеҙ булып ҡалды.* Ә. Вахитов.

**ҺЫҘЛАУЫҠ** *и.* Тәндең берәр еренә эренләп сыға торған шешек, ваҡ сиҡан. *Ҡыҙыңды беҙгә бирмәһәң, битеңә сыҡһын һыҙлауыҡ* (Сеңләүҙән).

**ҺЫҘЛЫҠ** [1] *и.* Эс майын иретеп майын алғандан һуң иремәй ҡалған ҡалдығы. *Буҡтаға һыҙлыҡ һалып бешереү. Һыҙлыҡ ашау.*

**ҺЫҘЛЫК** [2] *и.* Тишек-ярыҡты ҡаплау өсөн тыға торған сүбәк, сепрәк-сапраҡ.

**ҺЫҘЛЫҠ** [3] *и.* Теш араһын соҡоп таҙартыу өсөн ҡулланылған нәмә; теш соҡоғос.

**ҺЫҘЛЫҠЛАУ** [1] *к.* Тишек-ярыҡты нимә менәндер тыҡҡыслау. *Тәҙрәне һыҙлыҡлау. Һыҙлыҡлап сығыу.* ■ *Тирмәнсе ағай кәмәне бик һәйбәтләп һыҙлыҡлаған.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҺЫҘЛЫҠЛАУ** [2] *к.* Теш араһын соҡоп таҙартыу. *Теште һыҙлыҡлау.*

**ҺЫҘЛЫҠЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **һыҙлыҡлау** [1]. *Кәмә һыҙлыҡлашыу.*

**ҺЫҘЛЫҠЛЫ** *с.* Һыҙлыҡ [1] ҡушылған, һыҙлыҡ һалынған. *Һыҙлыҡлы бутҡа.*

**ҺЫҘМА** [1] *и.* **1.** Һыҙып төшөрөлгән шартлы һүрәт; һыҙым.

**2.** Һүрәттең төп һыҙаттарын билдәләп ҡуйған өлгө. *Ул [художник] буласаҡ картинаның тәүге һыҙмаһын .. сәнғәт институтының икенсе курсында уҡыған сағында уҡ эшләне.* «Ағиҙел», 1969, № 6.

**ҺЫҘМА** [2] *с.* **1.** Һыҙылып киткән, һыҙылып торған. *Әхмәҙи .. ике яҡлап теҙелеп, алыҫҡа һуҙылған һыҙма тауҙарға күҙ ташланы.* Ж. Кейекбаев. *Мин хәҙер һинең һыҙма ҡара ҡаштарыңа ғына ҡарап торорға ризамын.* Б. Хәсән.

**2.** Төрлө һыҙыҡ ырылған, биҙәүле; һыҙыҡлы. *Һыҙма балдаҡ.* ■ *Йәшел генә сана һыҙма тимер — һыҙҙырайыҡ урам буйына* (Халыҡ йырынан).

**3.** Әкрен генә һыҙып иҫеп торған; һыҙғаҡ. *Яландарҙан иҫкән һыҙма елгә шау-шыу итте Боғаҙаҡ ҡамышы* (Халыҡ йырынан).

**ҺЫҘМА** [3] *и.* **1.** (*йәки* **һыҙма уҡ**) Ос яғына ҡош йөнө йәбештереп, осло башаҡ ҡуйып яһаған яу уғы. *Мөйөҙ йәйә типкән һыҙма уҡтар һыҙғырып, көйләп, шыйлап уҙғандар.* Б. Вәлит. *Сибәғәт янын, уҡтарҙан өс һыҙманы алды ла тағы бер тәлтерәмә уҡ алырға рөхсәт һораны.* Ғ. Бирҙин.

**2.** (*йәки* **һыҙма мылтыҡ**) Саҡма таш менән сағып ата торған боронғо мылтыҡ; саҡма мылтыҡ. *Атайымдың һыҙма мылтығы бар ине. Ул көн дә бер һуйыр атып ала торғайны.* С. Кулибай.

**ҺЫҘМА** [4] *и. диал.* Һыҙғы.

**ҺЫҘМАҠЛАУ** *к.* Төрлөсә һыҙыу, һыҙғылау. *Сәриә ҡара ҡәләм осо менән күҙ ҡырыйҙарын һыҙмаҡланы.* Я. Хамматов.

**ҺЫҘМАЛАНЫУ** *к.* Һыҙған һымаҡ булыу. *Көмөш уҡа кеүек бормаланып, һыҙмаланып аға Дим һыуы.* С. Ҡудаш.

**ҺЫҘМАЛАУ** *к.* Һыҙыҡтар һыҙыу, һыҙыҡтар яһау.

**ҺЫҘМАЛЫ** *с.* Һыҙма [1] (2 мәғ.) биҙәге бар, биҙәкле. *Ғәлиәкбәрҙен .. аяҡта һары күн һыҙмалы, күнысы ҡайтарыулы аҡ бурка.* З. Биишева.

**ҺЫҘЫҠ** [1] *и.* **1.** Бик тар ғына итеп нимәгәлер төшөрөлгән буй. *Тура һыҙыҡ. Кәкере һыҙыҡ. Һыҙыҡ һыҙыу. Һыҙып яһаған тыныш билдәһе. Һыҙыҡ аша яҙыу. Һыҙыҡ ҡуйыу.*

**2.** Буйға тартып, уйып яһалған улаҡ, сыйыҡ. *Йәй етеп, ағастарҙан сайыр сыға башлағас, ул сайырсы ҡарағайҙарға һыҙыҡ һыҙа башлай.* «Совет Башҡортостаны», 1969, 23 август.

**3.** Ике араны бүлгән, нимәнеңдер сиген билдәләгән ысын йәки шартлы линия, буй. *Офоҡ һыҙығы. Сик һыҙығы. Фронт һыҙығы.* ■ *Берәүҙәр беҙҙең кеүек фронтҡа бара, икенселәр — ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро, бала-саға — фронт һыҙығынан тылға оҙатыла.* Т. Кусимов.

♦ **Алғы һыҙыҡ** дошман ҡаршыһындағы ҡораллы ғәскәр сафының буйҙан-буй тотоп торған урыны. *Алғы һыҙыҡта ара-тирә пулемёттарҙан атҡан тауыш ишетелә.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 21 февраль. **Һыҙыҡ алыу** бура бүрәнәһен һыҙыҡ буйлатып сабып сығыу.

**ҺЫҘЫҠ** [2] *и. диал. кар.* **һыҙлыҡ** [1].

**ҺЫҘЫҠЛАУ** [1] *к.* Һыҙыҡ [1] (1 мәғ.) һыҙыу. *Һыҙыҡлап сығыу.*

**ҺЫҘЫҠЛАУ** [2] *к. диал. кар.* **һыҙлыҡлау** [2]. ■ *[Нәркәс һәүбәнгә:] Атам ҡылыс тотҡанда теш һыҙыҡлап торорһоң; атам һуҙһа ҡулдарын кире артҡа китерһең.* М. Буранғолов.

**ҺЫҘЫҠЛЫ** *с.* **1.** Һыҙыҡ [1] (1 мәғ.) һыҙылған, һыҙығы бар. *Һыҙыҡлы дәфтәр.*

**2.** Төрлө биҙәк менән биҙәүле, һыҙмаһы бар, биҙәкле. *Һыҙыҡлы булыу. Һыҙыҡлы итеү.*

**ҺЫҘЫҠСА** *и.* **1.** Ҡыҫҡа һыҙыҡ [1] (1 мәғ.), бәләкәй һыҙыҡ.

**2.** *кар.* **дефис.**

**ҺЫҘЫЛЫУ** [1] *к.* **1.** *төш. кар.* **һыҙыу** [1] 1—4. *Һыҙылған һыҙыҡ.*

**2.** Һыҙған һымаҡ буй, нәҙек булып һуҙылыу. *Һыҙылып торған ҡаш.* ■ *Әхмәт нәҙек кенә кәүҙәле, яңы ғына һыҙылып сығып килгән ҡара мыйыҡлы егет.* С. Агиш. *Ай уймаҡай кеүек һыҙылып аға Ашҡаҙарҡай һыуының ағышы* (Халыҡ йырынан).

**3.** Оҙон буй булып яҡтырып тороу, беленеү. *Һыҙылып ҡына ятҡан тау буйынан китерме икән, эсәй, юлдарым* (Сеңләүҙән). *Бына бер ваҡыт һыҙылып ҡына өҫтән яҡтылыҡ төшә башлаған* (Әкиәттән).

♦ **Таң һыҙылыу** төн көнгә әйләнеү алдынан ҡояш нурҙарын йән-яҡҡа тарата башлау. *Ишутған Яғалса һыртына килеп меңгәндә таң һыҙылып килә ине инде.* З. Биишева.

**ҺЫҘЫЛЫУ** [2] *к.* **1.** Эҫенән иреү (туң майға ҡарата). *Табала май һыҙыла.*

**2.** *күсм.* Оҙон-оҙаҡҡа һуҙылыу. *[Староста:] һыҙылып-мыҙылып сәй эсер мәл түгел, хәҙрәт.* Я. Хамматов. *Һыҙыла көндәр,.. һыҙыла бер туҡтамай* (Халыҡ йырынан).

**3.** *күсм.* Бик нескә, тәьҫирле булып яңғырау. *Һыҙылып сыҡҡан моң.* ■ *Атым ысыҡ кисеп ҡайтҡанда һыҙылып ҡына сыҡты ҡурай моңо.* Р. Бикбаев. *Таштуғайҡай буйы ай шау ҡамыш, һыҙылып ҡына сыға бер тауыш* (Халыҡ йырынан).

♦ **Елек майы һыҙылыу** ыҙа сигеү, яфаланыу. *Ирек өсөн аҙмы уҙамандың елек майҡайҙары һыҙылған.* Х. Назаров. **Йөрәк** (*йәки* **күңел**) **һыҙылыу** эсе ҡайғынан нык әрнеү. *Әсе хәсрәт көйөн көйләп, һыҙыла күңелем көндөҙ вә төн.* Д. Юлтый. *Һығыла тирәккәйем, ул бөгөлһә, ул һығылһа, һыҙыла йөрәккәйем.* Р. Ғарипов. **Һыҙылып илау** өнһөҙ әрнеп илау. *Фәүзиә мендәргә нығырaҡ һыйынды. Уның һыҙылып ҡына илағанын берәү ҙә ишетмәне.* Т. Килмөхәмәтов.

**ҺЫҘЫМ** *и. кар.* **һыҙма** [1].

**ҺЫҘЫНЫУ** *к.* Һыҙыу эше менән мәшғүл булыу. *Һыҙынып ултырыу.*

**ҺЫҘЫРА** *и. диал.* Тына. *Ике һыҙыра эшләп ҡайттым.* ■ *[Сәмиғулла] иртәнге сәйҙе эсте лә кул буйына барып бер һыҙыра һалабаш бәйләп китмәксе булды.* Ж. Кейекбаев.

**ҺЫҘЫРҒЫ** *и. диал.* Тына. *Ике һыҙырғы бесән сабыу.*

**ҺЫҘЫРҒЫС** *и.* Йүкә ҡабығының ҡара ҡыртышын һыҙырып, аҡ сей йүкә яһай торған айырсалы ҡорал.

**ҺЫҘЫРТҠЫС** *и.* Дым һыҡлау йәки ҡый үләндәрен ҡоротоу өсөн тупраҡты йомшарта торған машина.

**ҺЫҘЫРТЫУ** *к. йөкм. кар.* **һыҙырыу.** *Туҙ һыҙыртыу.*

**ҺЫҘЫРЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **һыҙырыу.** *Һыҙырылған туҙ.*

**2.** Ҡубып, әрселеү. *Олононоң буйынан-буйына тырнаҡ эҙҙәре ҡалған, сығырмаҡтары һыҙырылған, яртылаш ҡыуарған .. ағас күренде.* Я. Хамматов.

**3.** Сыйылыу, тире йәрәхәтләнеү. *Ҡулдәктә ҡандар күренде. Ҡараһам, түштәр буй-буй булып һыҙырылған.* Д. Юлтый.

♦ **һыҙырылып эшләү** ял белмәй, әрһеҙ рәүештә эшләү. *Ҡобора.. һыҙырылып эшләп йөрөнө лә йөрөнө.* Б. Бикбай.

**ҺЫҘЫРЫУ** *к.* **1.** Ҡуптарып, айырыу; әрсеү, тунау. *Ағастың ҡабығын һыҙырыу. Туҙ һыҙырыу. Һалабаш һыҙырыу.* ■ *Ул [Аҡъял батыр] бер бейәне тотоп һуйып, тиреһен һыҙырған да, ит бешерә башлаған (Әкиәттән). / күсм.* Өҫтән ҡаплап торған нәмәне тотош алыу. *Кәртә башы ҡалын булды, яҙға һыҙырып һыйырға ашатһаң да ярар.* Б. Бикбай. *«Үлән һутлы, йомшаҡ. Шуға ла еңел сабыла,— ти механизатор.— Көн һайын 16—18 гектар майҙанды һыҙырып ташлайым".* «Совет Башҡортостаны», 1970, 12 июль.

**2.** Сыйып, тирене йәрәхәтләү. *Ҡулды һыҙырыу.* ■ *Ҡурғаш йыртҡыстың яурынын ғына һыҙырып үтте.* Я. Хамматов.

**3.** *күсм.* Сыбыҡ йәки сыбыртҡы менән ныҡ итеп туҡмау; сыптырыу. *Һыҙыра тартыу. Тал сыбығы менән һыҙырыу.* ■ *[Исмәғил — Булатҡа:] Әлегә ебәрәм, икенсе берәүҙең балаһы булһаң, һыҙырыр инем.* К. Кинйәбулатова. / Көслө итеп бәреү (ҡар, ямғырға ҡарата). *Ғәрәсәт булып, ҡыя һыҙырып яуа борсаҡ.* Ф. Иҫәнғолов.

♦ **Һыҙырып эшләү** бөтә эште рәттән эшләү. *Инәй егәрлелеген һаман ташламаны, өй эштәреҙ һыҙырып эшләп йөрөнө.* Ғ. Шәрипов. **Һырт ҡайышын һыҙырыу** ныҡ туҡмау.

**ҺЫҘЫРЫШЫУ** *к. урт. кар.* **һыҙырыу** 1. *Һалабаш һыҙырышыу.*

**ҺЫҘЫУ** [1] *к.* **1.** Нимәгәлер бик тар итеп буй төшөрөү; сыйыу. *Ҡағыҙға һыҙыу. Ҡәләм менән һыҙыу.* ■ *Өй эсендә берәү аҡ ҡағыҙҙың өҫтәренә ниҙер һыҙғылай.* Ғ. Мәсғүт.

**2.** Тар ғына буйҙар төшөрөп, ниҙеңдер шартлы һүрәтен йәки һүрәттең тәүге өлгөһөн яһау. *Эскиз һыҙыу.* ■ *Архитектор өҫтәл эргәһендә күп саҡ чертёж һыҙып ултыра.* Ғ. Сәләм.

**3.** Хәреф төшөрөү, яҙыу. *Ҡултамғаны һыҙыу.* ■ *[Бай:] Ярар, бар эшеңдә бул. Аҙ-маҙ һыҙа-мыҙа белмәһәң, һинең менән, кеше итеп, һөйләшеп тә ултырмаҫ инем мин.* Ғ. Ғүмәр. *Уска йомоп йөрәк — ҡуҙҙы, был һүҙҙәрҙе кем һыҙҙы.* Р. Бикбаев.

**4.** Оҙон буй итеп, ниндәйҙер эҙ үткәреү. *Бүрәнәне һыҙыу. Бураҙна һыҙыу.* ■ *Таш кит асманда атылып, ут һыҙып.* Ш. Бабич.

**5.** Ут сығарыу өсөн ышҡыу (шырпыны). *Шырпыны һыҙып тоҡандырыу.* ■ *[Мозафар] һаламға шырпы һыҙып маташа.* Ф. Иҫәнғолов.

**6.** *күсм. һөйл.* Яҙма рәүештә ниндәйҙер эш-маҡсат билдәләү. *План һыҙыу.* ■ *Ленин бабай үҙе үлһә лә, уның һыҙған юлы бар* (Халыҡ йырынан).

**7.** *күсм. һөйл.* Тиҙ генә ҡасыу. *Мылтыҡ юл ине ҡулымда, урманға һыҙҙы бүре.* К. Хәбиб. *Балдаҡ ырғып иҙәнгә килеп төшә. Бесәй уны йәһәт кенә ауыҙына ҡаба ла, тәҙрәнән сығып һыҙа* (Әкиәттән). / Шәп итеп, жыйлап осоу. *Теймәне бит, уҡ яҙа һыҙҙы, ыңғырашып ботаҡ һынды* (Бәйеттән).

● *Бай барҙа ыҙан һыҙма, түрә барҙа түргә уҙма.* Мәҡәл.

**ҺЫҘЫУ** [2] *к.* **1.** Эҫенән иреп, һығылып сығыу һыҙылыу (туң майға ҡарата).

**2.** Әҙ генә беленеп, яй ғына хәрәкәт итеү. *Аҫтан һыҙып ятҡан йылға өҫтөнә ҡуйы күкһел өйрә булып, шыя ҡалҡа.* Ф. Иҫәнғолов. *Уйпат ерҙә ҡалған ҡар төркөмөн әкрен-әкрен һыҙып ел тарай.* Д. Юлтый.

**3.** *күсм.* Ауыр ҡайғынан, ауырыуҙан, кисерештән һ. б. өнһөҙ генә өҙөлөп ҡайғырыу йәки уйланыу. *Ошо хыялым менән эстән генә һыҙып йөрөнөм.* Ф. Иҫәнғолов. *[Әбей] көн-төн ҡайғыра башланы, ти. Шул ҡайғынан һыҙып, Умыҫка бары өс йәш тигәндә, үлеп ҡалды, ти* (Әкиәттән). *Айырылыу ауыр күнелгә, эстәр һыҙа гүмергә* (Халыҡ йырынан).

**4.** *күсм.* Бик саф, нескә, тәьҫирле итеп яңғыратыу. *Һыҙып сыҡҡан йыр.* ■ *Думбыраһы үлем көйөн һыҙҙы, аһ-зар, һыҡрау сыҡты моңонда.* Т. Морат. *Ҡурай! Ни көйләйһең, моң ғына һыҙып.* Д. Юлтый.

**ҺЫЙ** *и.* **1.** Кешене хөрмәт итеү өсөн әҙерләнгән аҙыҡ. *Һый әҙерләү. Һый ултыртыу.* ■ *Ҡунаҡ алдына ҡуялар һыйҙарҙың иң татлыһын.* М. Кәрим. *Һәр өйҙә байрам һыйы бешә, ығы-зығы килә килендәр.* М. Марат.

**2.** Ашап-эсеү, күңел асыу мәжлесе; табын, ҡунаҡ. *Һый ҡороу.* ■ *Иртәнән ҡара кискә тиклем барған һый һүрәнләнде.* Т. Хәйбуллин. *Майҙан йыйып, һый ҡорҙолар ир Бабсаҡҡа.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

♦ **Һыйың барҙа** ҡәҙерле сағыңда. *Һеҙ миңә ҡамасауламай ғына, һыйығыҙ барҙа мәктәптән сығып китегеҙ.* Ғ. Дәүләтшин. **Эт һыйын килтереү** ныҡ туҡмау, кәрәген биреү. *Атайың икебеҙҙе лә эт һыйын килтереп туҡмаһа, ил өҫтөндәге ояттан ҡайҙа барып йығылырбыҙ.* Һ. Дәүләтшина.

● *Һыйыры барҙың һыйы бар.* Мәҡәл.

**ҺЫЙҒАУЫР** *и. диал.* Һырғауыл. *Һыйғауыр башына менеү.*

**ҺЫҒЫҘЫУ** *к. диал.* Һыйҙырыу.

**ҺЫЙҒЫР** *с.* Шыйылдап торған йомшаҡ; шыйыҡ. *Һыйғыр сыбыҡ.* ■ *Офицер ҡамсыһын юғары күтәреп Кәримдең арҡаһына шый-шый тукмай башланы. Һыйғыр ҡамсы Кәримдең күлдәген тетеп бөтөрҙө.* Ш. Шәһәр.

**ҺЫЙҘАШ** *и.* Үҙ-ара ҡунаҡлашҡан кешеләр (бер-береһенә ҡарата).

**ҺЫЙҘЫҠ** *с. диал.* Ҡәҙерле (кейемгә ҡарата). // *Һыйҙыҡҡа кейеү. Һыйҙыҡҡа һаҡлау.*

**ҺЫЙҘЫҠТАУ** *к. диал.* Ҡәҙерләү, һаҡлау (кейем-һалымды). *Һыйҙыҡтап кейеү.*

**ҺЫЙҘЫРЫУ** *к.* **1.** Дәүмәлен тап килтереп, ниҙәндер үткәреү. *Ишеккә һыйҙырыу.* ■ *Тирмә ишегенә көскә һыйҙырып бик ҙур ашлауҙарға аштар килтерелде.* Т. Хәйбуллин. / Күләмен тап килтереп, ниҙеңдер эсенә урынлаштырыу. *Һауытҡа һыйҙырыу.*

**2.** Кешене яҡын күреп, араға ҡабул итеү. *Һыйҙырмай ебәреү.* ■ *Ныязғол бай йәтим эненән һыйҙырмай урыҫ түпһаһында йөрөтә.* Һ. Дәүләтшина.

◆ **Башҡа һыйҙырмау** нимәнеңдер шулай булыуын фараз итә алмау, мөмкин тип иҫәпләмәү. *Ғәжәп эш. Ер һелкетеп тор ҙа, бөтә милкеңде ташлап ҡара ер аҫтына керсе әле .. тип баштарына һыйҙыра алмайҙар.* Т. Хәйбуллин. *Кескәй Әнисә быңдай иғтибарһыҙлыҡты башына һыйҙыра алмай ғәжәпләнеп, әсәһенә ҡараны.* З. Биишева. **Эскә һыйҙырыу** *ғәҙәттә юкл.* өндәшмәй, белгертмәй үткәреү. *Шатлығымды эсемә һыйҙыра алмайым.*

**ҺЫЙҘЫРЫШЛЫ** *с. кар.* Һыйышлы. *Ике кешелек һыйҙырышлы мискә.*

**ҺЫЙКАШЫУ** *к. диал.* Һыйыныу. *Кешегә һыйкашыу.*

**ҺЫЙЛАНЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **һыйлау.** *Беҙ рәхмәттәр алабыҙ, һыйланабыҙ.* Д. Юлтый.

**2.** Ҡунаҡ булыу, һый ашау. *Батшаға барып һыйланып алғас, Көмөшбайҙың әсәһе үҙенең ниңә килгәнен әйткән* (Әкиәттән).

**ҺЫЙЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **һыйлау** 1.

● *Ҡунаҡ, китәм тип, һыйлата; хужа, китмә тип, һыната.* Әйтем.

**ҺЫЙЛАУ** *к.* **1.** Аш-һыу менән хөрмәтләү, ҡунаҡ итеү. *Ҡунаҡ һыйлау. Ҡоҙа һыйлау. Саҡырып һыйлау.* ■ *Һарайға ҡайтыу менән батша ике кейәүен ҡәҙерләп, ололап һыйлай* (Әкиәттән). / Ҡәҙер-хөрмәт йөҙөнән ни менәндер туйындырыу. *Ит менән һыйлыу. Сәй менән һыйлау.* ■ *Гөлбаҙыян уларҙы [балаларын] тары бутҡаһы менән һыйлар, байрамдарҙа тары онлап, күпереп торған тары ҡоймағы бешерер ине.* Ғ. Шәрипов.

**2.** Бүләк итеп биреү. *Ул [Тимерғәле] бөгөн .. Заһит кейәүе ата туны итеп һыйлаған ҡыҙыл сапанын кейгән.* Һ. Дәүләтшина.

◆ *Һыйлағанда һыу булһа ла эс.* Әйтем. *Һыйламаға һыйың булмаһа, һөйләмәгә телең булһын.* Әйтем. *Һыйлаһан, һый күрерһең.* Әйтем.

**ҺЫЙЛАУСЫ** *и.* **1.** Ҡунаҡ, мәжлес ваҡытында ҡунаҡтарҙы ашатып, эсереп йөрөгән кеше.

**2.** *этн.* Туйға ҡушылып, ҡоҙаларҙы ҡунаҡҡа алған кеше.

**ҺЫЙЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **һыйлау.** *Ҡунаҡ һыйлашыу.*

● *Илашыуға үҙ яҡшы, һыйлашыуға сит яҡшы.* Әйтем. *Ҡоҙа булғансы ныҡ һөйләш, ҡоҙа булғас ныҡ һыйлаш.* Әйтем. *Ҡоҙа ашы менән ҡоҙағый һыйлашҡан.* Әйтем.

**ҺЫЙЛЫ** *с.* **1.** Һый-хөрмәт ителгән; хөрмәтле, ҡәҙерле. *Һыйлы ҡунаҡ.*

**2.** Мул, һәйбәт, яҡшы аҙыҡлы. *Һыйлы ваҡыт.*

● *Танығаң ерҙә буй һыйлы, танымаған ерҙә түн һыйлы.* Әйтем. *Һыйлы көнөң һыйырҙа.* Мәҡәл.

**ҺЫЙЛЫМ** *и.* **1.** Дуҫтың, иптәштең ҡатыны. *Һыйлым булыу.* / Дуҫтың ҡатынына өндәшеү һүҙе. *Бәҙиға: төнгә ҡаршы ҡайҙа бармаҡ булаһығыҙ? — тип һыңғырҙай башлағайны ла, Яҡуп: — Ҡуй, һыйлым, ир-ат эшенә ҡыҫылма, беҙ тиҙ ҡайтырбыҙ,— тип, уны еңел тынысландырҙы.* Б. Бикбай.

**2.** Дуҫтарҙың, иптәштәрҙең ҡатындары (бер-береһенә ҡарата). *Һыйлым булыу.* / Ике дуҫ ирҙең ҡатындарының бер-береһенә өндәшеү һүҙе. *Нәсимә көләмһөрәп: „Һыйлым, сәй эсергә ултыр»,— тине.* Һ. Дәүләтшина.

**ҺЫЙМАЛЫ** *с.* Һыйырлыҡ. *Баш һыймалы тишек. Кеҫәгә һыймалы.* ■ *Илсебикә ҡарсыҡтар менән бала-сағаларҙы баш һыймалы ғына бәләкәс тәҙрәле ҡарағас өйҙәрендә ҡалдырып .. тау башына күтәрелгән.* Н. Иҙелбай. *Мәшәҡәтләнә торғас, приемник та әҙер булды. Кеҫәгә һыймалы бәләкәй генә приемник.* З. Хисмәтуллин.

**ҺЫЙПАҠЛАУ** *к.* Әлдән-әле туҡтауһыҙ һыйпау, тегеләй-былай һыйпау. *Мыйыҡты һыйпаҡлау. Сәсте һыйпаҡлау.* ■ *Ғәләүи бер күҙен ҡыҫа төшөп, кәзә һаҡалын һыйпаҡлап торҙо.* М. Хәйҙәров.

**ҺЫЙПАНЫУ** *к. ҡайт. кар.* **һайпау 1.**

**ҺЫЙПАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **һыйпау.**

**ҺЫЙПАУ** *к.* **1.** Ус менән нимәнеңдер өҫтөнән йөрөтөү. *Башты һыйпау. Һаҡалды тубығыма һалып, ҡул һыртын һыйпап, иркәләп ултырғым килә.* Т. Йәнәби. / *күсм.* Йомшаҡ ҡына итеп өҫтән йөрөтөп тейеү (ел, һауаға ҡарата). *Иртәнге ел әкрен генә өрөп, һыйпап үтә үлән баштарын.* Ғ. Сәләм.

**2.** *күсм. һөйл.* Тиҙ генә ашап бөтөрөү. *Бер туҫтаҡ ашты һыйпап ҡуйыу.*

◆ **Баштан һыйпамау** кешене ниндәйҙер эше, ҡылығы өсөн яуап бирҙереү, хупламау. *[Тәүфиҡа Мөхтәргә:] Кемде ҡанат аҫтына алғаның-ды беләм .. Быңың өсөн һинең башыңдан һыйпамаҫтар! Урыныңдан осҡаныңды белмәй ҙә ҡалырһың.* С. Кулибай. **Ыңғайға һыйпау** ни ҡылһа ла хуплау. *Сәғиҙә уларҙың ыңғайына ғына һыйпап торҙо.* М. Тажи.

**ҺЫЙСАН** *с.* Кешене һыйларға, ҡунаҡ итергә яратҡан, ҡунаҡсыл. *Ҡарабай айбар ир булған, һыйсанлыҡта бер булған.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ҺЫЙСЫЛ** *с.* Кешене һыйларға, ҡунаҡ итергә яратҡан; ҡунаҡсыл.

**ҺЫЙ-ХӨРМӘТ** *и. йыйн.* Ҡунаҡты ҡәҙерләп ашатыу, эсереү өсөн әҙерләнгән аҙыҡ-түлек. *Һый-хөрмәт әҙерләү.* ■ *Йырлайыҡ беҙ был яңы йылда, һый-хөрмәт мул булһын табында.* Н. Иҙелбай.

□ **Һый-хөрмәт итеү** (*йәки* күрһәтеү) ҡәҙерләп ашатыу-эсереү, хөрмәтләп ҡунаҡ итеү. *Ҡайтыр саҡта хужа беҙҙе бик ҙур һый-хөрмәт күрһәтеп, юлға ашарға биреп, иларҙай булып оҙатып ҡалды.* Ж. Кейекбаев.

**ҺЫЙЫҠ** *с. диал.* Шыйыҡ.

**ҺЫЙЫМ** *и. ҡар.* Һыйыш.

**ҺЫЙЫНДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Нимәгәлер нык яҡын килтереү, яҡынлатыу. *Мөйөшкә һыйындырыу.*

**2.** Ярҙам, хәстәр күрһәтеп, яҡынлатыу. *Үҙеңә һыйындырыу.*

**ҺЫЙЫНЫУ** *ҡ.* **1.** Нимәгәлер нык яҡын килеп терәлеү. *Ҡосаҡҡа һыйыныу. Һыйынып ултырыу.* ■ *Ҡаяларға һыйынып ауыл ята, уң яғында иркен, киң дала.* Х. Ҡунаҡбай.

**2.** Ярҙам өмөт итеп яҡынлау. *Аптыраным, талдым, юлдан яҙҙым, ярҙам һорап һиңә һыйындым.* Х. Ғәбитов.

**ҺЫЙЫНЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* һыйыныу [1]. *Һыйыныштып ултырыу.* ■ *Бер-береһенә һыйынышып, ашыҡмай ғына атлаусы ике шәүлә ҡапыл күҙҙәремә салынды.* Д. Исламов.

**ҺЫЙЫР** *и.* Һөт өсөн аҫралған айыры тояҡлы эре мөгөҙлө инә мал. *Тана һыйыр. Туҡал һыйыр. Һөтлө һыйыр. Һыуын һыйыр. Һыйыр көтөү. Һыйыр һауыу.* ■ *Быҙау ауыҙын тейҙереп, әҙерәк тылҡытып алмағас, һыйыр эймәй икән.* Ф. Иҫәнғолов. / *күсм. һөйл.* Әкрен, ҡулайһыҙ ҡуҙғалған ҡатын-ҡыҙға әйтелә. *[Кәрим — Сәрбигә:] Һыйыр, алдыңа ҡарап йөрөй белмәйһең.* Х. Ибраһимов.

♦ **Ҡыр һыйыры** *диал.* мышы. **Һыйыр ауырыуы** ығыш, булдыҡһыҙ кешегә ҡарата әйтелә. **Һыйыр йылы** ун ике йыллыҡ мөсәлдең икенсе йылы. *Һыйыр йылы йот йылы һанала, йыл насар килә.* Һынамыш. **Һыйыр ҡойроғо тейеү** *шаяр.* аҙыҡ-түлек бәрәкәтле, мул булыу; һөт-май йоғоу (аҙыҡҡа). **Һыйыр мөгөҙөнә элер нәмәһе юҡ** бик нык ярлы, кейем-ҡаралдыһы бөтөнләй юҡ, тигәнде аңлата. *Өйөндә һыйыр мөгөҙөнә элер нәмәһе, йорт малынан бесәйе лә юҡ.* Һ. Дәүләтшина. **Һыйыр сәнскәге** *диал.* уҡра. **Һыйыр теле** еп буяу өсөн һары буяу алына торған оҙонса киртләс япраҡлы, ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған һары сәскәле үлән. **Һыу һыйыры** эре мөгөҙлөләр ғаиләһенә ҡараған йылы яҡта аҫрала торған һирәк кенә ҡыҫҡа йөнлө, ҙур кәкере мөгөҙлө, айыры тояҡлы эре мал.

● *Ағиҙелдең аръяғында бер әнәгә бер һыйыр.* Әйтем. *Бер һыйырҙың ҡойроғо йөҙ һыйырҙы бысрата.* Әйтем. *Һыйырға ябыу килешмәй.* Әйтем. *Һыйыры барҙың һыйы бар.* Мәҡәл.

**ҺЫЙЫРҒОЙРОҠ** *и.* Һары суҡ сәскәле, алмаш япраҡлы бейек ҡый үләне.

**ҺЫЙЫУ** *ҡ.* **1.** Дәүмәле тап килеп, тишек-ярыҡҡа үтеү. *Гимнастёрканың яғаһы үгеҙ муйыны өсөн эшләнгәнме ни — минең ике муйын һыйырлыҡ.* Д. Юлтый. / Күләме тап килеп, ниҙеңдер эсенә урынлашыу. *Һыуы ярына һыймаған йылғаһы күп Урал тау* (Ҡобайырҙан). *Шунан [ат] һарай эсенә һыймай сапсынып һикерә, үрәпсей башланы, ти* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Ниҙер билдәләгән сик-самаға тап килеү. *Йолаға һыймаған эш.* ■ *[Ҡормой:] Бер ауылдың күҙ терәп торған урманын һатып ашайһың бит. Был ниндәй законға һыя.* Б. Бикбай.

**3.** *күсм.* Ярап, артыҡ күренмәй йәшәү. *[Бай бисәһе:] Бала-сураһы менән һыйып тороуҙары етмәй, бай балаһын ҡағалар.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Аҡылға** (*йәки* **башҡа**) **һыймау** нимәнеңдер шулай булыуына ышана алмау; ышанмау. **Донъяға һыймау** шашып, бөтә кешене рәнйетеп йөрөү. **Эскә һыймау** шатлыҡ, ҡайғы һ. б. берәр тойғоно белгертмәй түҙә алмау. *Асыуы эсенә һыймай.* **Тирегә һыймау** асыуланып, түҙә алмаҫ булыу.

● *Ҡыҙыл телем тыймаһым, ҡыҙым өйөнә һыймаһым.* Мәҡәл.

**ҺЫЙЫШ** *и.* Нимәнеңдер үҙ эсенә һыйҙырыу мөмкинлеге. *Самауырҙың һыйышы. Мискәнең һыйышы. Һыйышы ҙур.*

**ҺЫЙЫШЛЫ** *с.* Күпмелер күләмде һыйҙырырлыҡ. *Бер күнәк һыу һыйышлы ҡаҙан.* ■ *Өс йөҙ кеше һыйышлы клуб залы шығырым тулы.* Ҡ. Ибәтуллин.

**ҺЫЙЫШЫУ** *ҡ.* **1.** Күмәкләп бер урынға һыйыу. *Бик күп һыбай кеше юлға һыйыша алмай, юл эргәһендәге сиҙәмлектән килә ине.* Б. Ишемғол.

**2.** Үҙ-ара татыу, талаш-тартышһыҙ йәшәү. *Һыйышып йәшәү.* ■ *Нәжиә апай һис кенә лә һыйышып йәшәй алмаҫлыҡ үтә уҫал ҡатын булып тойолдо.* И. Ғиззәтуллин.

♦ **Асыуға һыйыша алмау** нык асыуланып нишләргә белмәй ярһыу. *Дейеү асыуына һыйыша алмай, ҡойроғон һелтәп ебәргән* (Әкиәттән). **Майына һыйыша алмау** яҡшы тормоштан, рәхәтлектән ҡотороноу, шашыу. *[Фронтовик:] Сәлимгәрәй байҙың ауыҙына сүбәк тығыр ваҡыт етте инде, егеттәр! Беҙ фронтта окоптарҙа сереп ятҡыҡ, улар бында майҙарына һыйыша алмайҙар.* А. Карнай.

**ҺЫҠА** *и. диал.* **1.** Бәҫ, ҡырау.

**2.** Өрпәк ҡар.

**ҺЫҠҠЫС** *и. һөйл.* Һығып, ниҙеңдер майын, һутын сығара торған ҡорал. *Балауыҙ һыҡҡыс. Май һыҡҡыс.*

**ҺЫҠМЫР** *с.* Нәмәһен нык йәлләгән, үтә нык, бик һаран. *Һыҡмыр кеше. Һыҡмыр булыу.* ■ *Ҡадир кейәү һыҡмырыраҡ нәмә ахыры, бер саҡырып йөҙ күрһәткәне юҡ.* Б. Бикбай.

**ҺЫҠМЫРЛАНЫУ** *ҡ.* Һыҡмырға әйләнеү, һыҡмыр булыу. *Эреҫ әбейен әйтмә лә инде. Төптө донъянан туя торғаны юҡ .. һыҡмырланып ала ла йөрөй.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҺЫҠРА** *и.* **1.** Ауырыу һ. б. сәбәп менән ағып, тамып еҫләнеп һаҫыҡ булып торған бәүел. *Һыҡра еҫе. Һыҡраһы аңҡып тора. Һыҡраһы ҡойолоп йөрөй.* / *с. мәғ.* Шул еҫ сығып торған. *Һыҡра әҙәм. Һыҡра булыу.*

**2.** *күсм.* Үҙен эре тотоп маташҡан меҫкен кешене мыҫҡыллап әйтелә. *[Ҡолморҙа:] Йолкош, һыҡра, тине лә Әлекәйгә, бар .. таш һарайға бикләп ҡуй, тип бойорҙо.* Т. Хәйбуллин.

**ҺЫҠРАНЫУ** *ҡ.* Ҡайғынан эрнеү; әсенеү. *Ярлыларҙың һыҙланып, һыҡраныуҙары ҡолаҡ төптәренән яңғырап үтеп китҡән кеүек булды.* М. Ғафури. *Ысыҡ кипкәндә керпегем ысыҡланыр, тип белмәнем. Ҡайғы утында йөрәгем һыҡраныр, тип белмәнем.* Х. Ғиләжев. / Ауыр-

һыныу, зарланыу. *Беҙ һыҡырана-һыҡырана бөтөнләй тиҫкәре яҡҡа киттек.* Р. Ғабдрахманов.

**ҺЫҠРАТЫУ** *ҡ.* Ныҡ әрнетеп, яфалап, ҡайғыртып һ. б. әсендереү, һыҡрарға сәбәп биреү. *Йөрәкте һыҡратыу.* ■ *Һыҡратмаһыҙ ҡарғап, мин дә һеҙҙәй бер гонаһһыҙ әҙәм балаһы.* Ғ. Амантай.

**ҺЫҠРАУ** *ҡ.* Ауыр кисерештән, ҡайғынан һ. б. ныҡ әрнеү, үсенеү. *Йөрәк ҡанын ағыҙып, һыҡрай-һыҡрай шулай йөрөнө Зәйнәп йыл буйы.* Ғ. Сәләм. *Шатлыҡ менән йәшәр минуттарҙы үткәрәм мин һыҡрап, аһ ороп.* С. Ҡудаш.

**ҺЫҠРАШ** *и.* Ныҡ ҡайғырған, әрнегән ауыр кисереш. *Ҡан-йәш, әрнеш, һыҡраш менән ауыл гөж килә.* И. Насыри.

**ҺЫҠРЫҠ** *и.* Тота алмай ағып йөрөгән бәүел; һыҡра. *Һыҡрыҡ еҫе.*

**ҺЫҠТАТЫУ** *ҡ. диал.* Һыҡратыу.

**ҺЫҠТАУ** *ҡ.* **1.** Әсенеп, әрнеп, өнһөҙ илау. *Һәр таң һыҡтап уны бер ҡыҙ көткән, ана шул ҡыҙ инде Зөлхизә.* С. Кулибай. *Кем өсөн аҙап сигеп, һыҡтап түктеләр ҡанлы йәш.* Т. Йәнәби.

**2.** Ауыр кисерештән, ҡайғынан әрнеү; әсенеү, һыҡрау. *Йөрәк һыҡтай.*

**ҺЫҠТАШ** *и.* Ауыр ҡайғынан, хәсрәттән һ. б. ауыр кисерештәрҙән әрнеп, әсенеп илаған хәл. *Зөләй әбей инеп, ҡанға батҡан улын күреп иҫе үңгәләп алды ла, улына ташланды .. Уның артынан .. өйҙә сыр-сыу, илаш, һыҡташ китте.* Т. Хәйбуллин.

**ҺЫҠТАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **һыҡтау** 1.

**ҺЫҠТЫРЫУ** *ҡ.* Һығырға ирек ҡуйыу. *Билде һыҡтырыу.*

**ҺЫҠЫ** *с.* **1.** Ҡышҡы ҡаты һыуыҡта сана табанын тотоп ятҡан бик ныҡ туң. *Һыҡы юл.* // *Ылаусылар ауыр йөктө саҡ тартҡан аты артынан, һыҡыла сана табаны шығырлауын тыңлап, көндәр буйы һәлп-һәлп атлай ҙа атлай.* Н. Мусин.

**2.** Иреп, еншеп ятҡан (ҡарға ҡарата). *Һыҡы юл.*

**ҺЫҠЫЛАНЫУ** *ҡ.* Һыҡыға (2 мәғ.) әйләнеү, һыҡы булыу. *Һыҡыланған юл.* ■ *Март башы .. Ҡояш күҙҙәрҙе сағылдырып ҡыҙҙыра. Төш ваҡытында юл ҡатыһы ла йомшарып, сана табаны аҫты һыҡылана.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҺЫҠЫЛАУ** *ҡ.* Һыҡы юлда тотолоу, ауырайыу. *Сана һыҡылай.*

**ҺЫҠЫУ** *ҡ.* **1.** Шылмай, шыуып үтмәй, тотҡарланыу. *Сана һыуыҡта һыҡый.* ■ *Бер урында сана тамам һыҡып ултырҙы бит.* Н. Мусин.

**2.** Ҡоро аҙыҡ һ. б. тамаҡтан үткәндә шылмау, тотҡарланыу. *Картуф ҡоро тамаҡҡа һыҡыны.* ■ *Төҙло эҫе пар, һауаға күтәрелеп, тамаҡҡа һыҡый.* З. Биишева. *Наҡышевтың эсе бошто .. Ашағаны тамағына һыҡыны, эскәне — төйөн булып эсен өйкәне.* Я. Хамматов.

**ҺЫЛА** *и.* Алабуғалар ғаиләһенә ингән эре, ҡиммәтле йыртҡыс балыҡ. *Һыланың майы шифалы.* ■ *[Мәрфуға:] Беҙ һинең менән ниндәй балыҡ алғайныҡ әле? [Гөлгөл:] Һыла, Мәрфуға апай.* И. Абдуллин.

**ҺЫЛАМА** *р.* Күләме һауыттың сите менән тиң. *Һылама табаҡ он. Һылама ғына итеп бесән тейәү.*

◆ **Һылама юл** ҡар баҫҡан юл.

**ҺЫЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Һылынған хәлгә килтереү. *Ҡулға балсыҡ һыландырыу.*

**ҺЫЛАНЫП-ҺЫЙПАНЫУ** *ҡ.* Төҙәтенеү, биҙәнеү. *Һыланып-һыйпаныҫ ҡунаҡҡа барыу.* ■ *Ул көндө Сәлмән айырыуса бер талапсанлыҡ менән кейенде. Ҡағынды, һуғынды, һыланып-һыйпанды.* Ә. Вахитов.

**ҺЫЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **һылау.** *Һыланған өй.* ■ *Штукатурҡаның .. балсыҡ менән һыланған урындары ҡубып төшкән.* Я. Хамматов.

**2.** Яғылып, ныҡ йәбешеү; һылашыу. *Иҙәнгә бер иле батҡаҡ һыланған.* Б. Бикбай.

**3.** *күсм.* Тәнгә ятып, һылашып, килешеп тороу (кейем-һалымға ҡарата). *Тәнгә һыланып торған күлдәк.*

**ҺЫЛАП-ҺЫЙПАУ** *ҡ.* Ҡәҙерләү. ҡәҙерләп тотоноу (кейем-һалым һ. б. ҡарата). *Төлкө тиреһен тағы ҡат-ҡат ҡарап, һылап-һыйпап, сөйгә элеп ҡуйҙылар.* С. Кулибай. / Яратып һөйөү. *Хәбир ағаһын һылап-һыйпап .. оҙатты.* Ә. Вахитов.

**ҺЫЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **һылау.** *Өйҙө һылатыу. Эсте һылатыу.*

**ҺЫЛАУ** *ҡ.* **1.** Нимәгәлер йомшаҡ, һыулы нәмә йәбештереү. *Балсыҡ һылау. Һылап ҡуйыу. Өй һылау. Мейес һылау. Нигеҙ һылау.* ■ *[Бәҙигә] өс булмәле бәрәс ояһын һылап, ағартып бирҙе.* И. Ғиззәтуллин. *Аҡ ҡарҙарҙы елдәр тәҙрәгә килтереп һылай.* Ғ. Хәйри.

**2.** Дауалау маҡсатында тәнде ыуыу. *Билде һылау. Эсте һылау.* ■ *Елен шешә башлаһа, ҡыҙыл балсыҡҡа һеркә ҡатыштырып һыларға кәрәк.* Ф. Төхвәтуллин. / *күсм.* Яратып һөйөү, ҡәҙерләү. *[Ҡарасәс:] Салҡар күлдә йөҙгән аҡҡош кеүек, Ынйыҡайҙы Һылап үҫтерҙек.* Х. Ғәбитов.

◆ **Һылап ҡуйған һымаҡ** тәнгә килешеп таман ғына булып тороу (кейемгә ҡарата). *Ҡыҙҙарҙың өҫтөндәге пальтолары .. кәүҙәләренә һылап ҡуйған кеүек, бер генә килешмәгән йөйөн дә тапмаҫһың.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 9 ғинуар.

**ҺЫЛАШҠАҠ** *с.* Һылашып, йәбешеп тороусан. *Һылашҡаҡ балсыҡ.*

**ҺЫЛАШҠАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Һылашҡаҡҡа әйләнеү, һылашҡаҡ булыу. *Ямғырҙан һуң юл һылашҡаҡланды.*

**ҺЫЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Яғылдырып, ныҡ йәбештереү. *Балсыҡты һылаштырыу.*

**ҺЫЛАШЫУ** *ҡ.* **1.** *урт. ҡар.* **һылау.** *Келәт һылашыу. Нигеҙ һылашыу. Өй һылашыу.*

**2.** Яғылып, ныҡ йәбешеү; һыланыу. *Тупраҡ дымлы, ауыр, көрәккә һылашып тора.* Х. Ғиләжев.

**3.** Йәбешкәк һымаҡ ныҡ яҡынайып терәлеү, лыпашыу. *Ул [Хөснулла] ергә һылаща төшкән күбәгә менде.* Р. Низамов. *[Бер егет] атының ялына һылашып ятып килеп инде.* Ф. Иҫәнғолов.

**4.** *күсм.* Тәнгә таман ғына килешле булып ятыу; килешеп тороу. *Д. Юлтыйҙың өҫтөндә бик килешле, тәненә һылашып торған һоро шинель.* С. Агиш.

**5.** *күсм.* Ныҡ ылығыу, һырлығыу. *Абдрахмандың егетлегә алдында баш эйеп, уға һылашып*

*йөрөгән ваҡыты булған уның [егеттең].* Ә. Вахитов.

**ҺЫЛҒАУЫР** *и. диал.* Күсәк.

**ҺЫЛТАҠЛАУ** *к. кар.* **һылтыҡлау.** *Һылтаҡлап атлау.*

**ҺЫЛТАЛАУ** *к. кар.* **һылтаулау.**

**ҺЫЛТАМА** *и. кар.* **тоҫҡама.**

**ҺЫЛТАНЫУ** *к.* Үҙеңде аҡлау өсөн ғәйепте, сәбәпте нимәгәлер ауҙарыу. *Он заводы хужаһы һуғыш ауырлыҡтарына һылтанып, күптәрҙе эштән сығарҙы.* З. Биишева.

**ҺЫЛТАУ** [1] *к.* Ғәйепте, сәбәпте кемгә йәки нимәгәлер ауҙарыу. *[Гөлъямал — Нәфисәгә:] Улбыл хәл булһа, миңә һылта, .. мин йәшергән, тиерһең.* Я. Хамматов. *Ғәйебеңде сит кешегә һылтау — ул аҡланыу түгел.* Ғ. Сәләм.

**ҺЫЛТАУ** [2] *и.* Аҡлау, аҡланыу өсөн табылған сәбәп. *Һылтау итеү. Һылтау эҙләү. Һылтау табыу.* ■ *Ә Буранбай һәр төрлө һылтау менән һәр көн эшселәр араһына барып йөрөнө.* Д. Юлтый. *Егет һылтау итеп, икмәк эҙләргә сығып киткән* (Әкиәттән). **Бер һылтауҙан** *йәки* **ике һылтау** ниндәйҙер бер сәбәп сыҡҡанда икенсе эште эшләп ҡалырға уйлағанды белдерә. *Зөләйхә әбей бер һылтауҙан киленен ҡымыҙсылыҡ эше менән ҡыҙыҡһындырып булмаҫмы тип өмөтләнеп, үҙҙәре менән алып йөрөгөһө килә ине.* З. Биишева. **Һыныҡҡа һылтау** бәләкәй генә сәбәпте сәбәп иткән кешегә ҡарата әйтелә. *Аҙыҡ ташыусылар бурандан элек ҡайтып киткәйне, хәҙер, һыныҡҡа һылтау, килеп күренгәндәре лә юҡ.* И. Ғиззәтуллин. **Юҡ һылтауҙы бар итеү** сәбәп юҡта сәбәп тапҡан булыу. *Заһиты ла юҡ һылтауҙ бар итеп, хеҙмәтсене эҙләп килә. Үҙенең ике күҙе Бибисарала.* Я. Хамматов.

● *Туй һылтауы менән тайлы булдым.* Әйтем.

**ҺЫЛТАУЛАНЫУ** *к. кар.* **һылтаулау.** *Ваҡыт юҡҡа һылтауланыу.* ■ *Старатель ат көсө етмәүенә һылтауланып биш кешенән артыҡ ултыртырға теләмәне.* Я. Хамматов.

**ҺЫЛТАУЛАУ** *к.* Һылтау, сәбәп табыу. *Утын юҡ, тип һылтаулап, мейескә яҡмаған.*

**ҺЫЛТЫҠ** *с.* Бер аҙ аҡһағыраҡ. *Алға үтте шунда Татлыбай. Сулаҡ ҡулын һуҙған, аяҡ һылтыҡ.* З. Биишева.

**ҺЫЛТЫҠЛАУ** *к.* Бер аҙ аҡһау, әҙерәк сатанлау. *Һылтыҡлап атлау.* ■ *Һылтыҡлап бара бер әбей, таяҡ тотоп бер ҡулға.* К. Кинйәбулатова.

**ҺЫЛЫУ** [1] *к.* Һуйған итте һөйәктән тотош көйө һыҙырып айырыу. *Майын һылып алыу.*

**ҺЫЛЫУ** [2] *с.* **1.** Тышҡы ҡиәфәте, төҫө-буйы камил; матур, сибәр. *Һылыу егет. Һылыу ҡыҙ. Һылыу буй.* ■ *Бер ҡыҙ килеп сыға. Яулығын асып ебәрһә: ай шикелле һылыу, ти, был ҡыҙ* (Әкиәттән). // *Аҡмырҙа был һылыуҙан күҙен ала алмаһа ла, .. уятмаҫҡа булған* (Әкиәттән). / Ҡатын-ҡыҙға өндәшкәндә әйтелә. *Эй һылыуым, һиңә ни бирәйем, Бохаранан килгән малым юҡ* (Халыҡ йырынан).

**2.** Тышҡы булмышы төҙөк, күңелгә ятышлы; матур. *Һылыу ҡайын.* ■ *Ай, Уралым, Уралым, һылыу ҙа һылыу Уралым! Һүҙем бөтһә лә теләмдә, йырым бөтмәҫ, Уралым!* Салауат Юлаев.

● *Һылыу һылыу күренмәҫ, һөйгән һылыу күренер.* Мәҡәл.

**ҺЫЛЫУ** [3] *и.* **1.** Үҙеңдән кесе ҡыҙ туған; һеңле. *Һыуға барғанда, кейәүҙең үҙ һылыуы йә яҡын берәүе иң тәү башлап ҡоро көйәнтәне күтәреп бара.* М. Буранғолов. / Үҙеңдән кесе ҡатын-ҡыҙға өндәшеү һүҙе. *[Рәзимйән — Оркояға:] Юлда ирҙәрҙең иркен сикләргә ярамаҫ ине, һылыу.* Н. Иҙелбай. *[Алпамыша:] Барсынһылыу, күҙең миңә һалсы, һылыу.* «Алпамыша».

**2.** *диал.* Ҡатынға иренең өлкән һеңлеһе; оло ҡейенһеңле.

**ҺЫЛЫУҠАЙ** *и.* Ҡыҙ балаға, йәш ҡатын-ҡыҙға иркәләп өндәшеү һүҙе. *[Әбей:] Һин кем балаһың, балам? Ни йомошоң бар, һылыуҡай* (Әкиәттән).

**ҺЫЛЫУҠАС** *и. кар.* **һылыуҡай.**

**ҺЫЛЫУЛАНЫУ** *к.* Һылыуға әйләнеү, һылыу булыу. *Ул [Гөлйемеш] күптән бирле күрмәгән янғыҙ ҡыҙының, бөтөнләй үҙгәреп, һылыуланып, тулыланып китеүенә ҡапыл ғына күҙ ташланы.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҺЫЛЫУЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **һылыулау.**

**ҺЫЛЫУЛАУ** *к.* Айғырҙы бестереү.

**ҺЫЛЫУЛЫҠ** *и.* Һылыу булыу сифаты, күркәмлек, матурлыҡ, сибәрлек. *Заятүләк һыу ҡыҙының һылыулығына тамам һушы китеп, тын алырға ла ҡурҡып ҡатып ҡала.* «Заятүләк менән һыуһылыу». *Айға ла ғына көнгә тиңләмәйем, һылыулығың, Шәүрәм, шул саҡлы* (Халыҡ йырынан).

● *Һылыулыҡ менән һыу буйлап булмай.* Әйтем.

**ҺЫЛЫШЫУ** *к. диал.* Һыйыныу.

**ҺЫМАҠ** *бәйл.* **1.** Берәр нәмәнең сифатын, ҡылығын икенсе нәмәнекенә оҡшатҡанда төп килештәге һүҙҙәр менән ҡулланыла; кеүек, шикелле. *Диңгеҙ һымаҡ күл. Сәскә һымаҡ бала.* ■ *[Шәхми — Ғәләүгәе] Ана минең ҡыҫҡа еләндә, итекте кейеп, егет һымаҡ булып ал.* Т. Йәнәби. / Айырымланған сағыштырыу һүҙбәйләнештәрендә ҡулланыла. *Ул бит һинең, әкиәттәге һымаҡ, һис онотолмай торған гүмереҥ.* Ғ. Сәләм. / Сағыштырыу һөйләмдәрендә хәбәр яһау өсөн ҡулланыла. *Һин, Зөлхизә, яҙғы ҡояш һымаҡ.* З. Биишева.

**2.** Кемгә йәки нимәгәлер өлгө итеп, тиңләп сағыштырғанда төп килештәге һүҙҙәр менән ҡулланыла. *Ҡыуат һымаҡ ирҙәр һирәк, аҡыл менән дау кисә* (Халыҡ йырынан). / Сағыштырып баһалау өсөн ҡулланыла. *Ҡыйын һымаҡ ине.* ■ *[Фатима:] Бигерәк аҡыллы бала, .. мине үҙ әсәһе һымаҡ күрә, бахыр.* Б. Бикбай.

**3.** Шартлы фараз төшөнсәһен биреү өсөн ҡушма хәбәрҙә ҡулланыла. *Ғабдрахман Фәхри ул ҡарттарғараҡ тартым һымаҡ.* Ш. Бабич.

**4.** Сағыштырма әйәрсән һөйләмдәрҙе теркәү өсөн ҡулланыла. *Ул оҫта итеп һөйләй белмәгән һымаҡ, килештереп яҙа ла белмәй.*

**ҺЫМРАҠ** *и.* Имсәк балаға һөт имеҙеү өсөн яһалған мөгөҙ имеҙлек. *Һымраҡ имеҙеү.* ■ *[Закир:] Резеданы бик һәйбәт итеп һымраҡтан да имеҙергә мөмкин. Минең үҙемде лә әсәйем шулай тәрбиәләгән.* Ш. Насыров. / Имеҙлек. *Балаңа һымраҡ ҡаптыр.*

**ҺЫН** [1] *и.* **1.** Тышҡы тән төҙөлөшө; кәүҙә, буй. *Һыны матур. Һылыу һын.* ■ *Ер хуры һин йәки*

*ожмах шәуләһе, һындарың гүйә фирештә кәүҙәһе.* Салауат Юлаев. / Нимәнеңдер тышҡы күренеше, тышҡы яһалышы. *Ҡул ағалай ҡуҡ тирәк, ҡуҡ тирәктең һыны юҡ япрағын ҡойған һуң.* М. Буранғолов.

**2.** Кемдең йәки ниҙеңдер тышҡы рәүеше, килбәте, төҫ-ҡиәфәте. *Ҡатын һынына инеү.* ■ *Мәтәм Хажыйҙа йәп-йәш, хатта сабый һыны ла китмәгән .. Йосопйән исемле йәтим малай батрак булып торҙо.* Н. Ҡәрип. *[Бай:] Ауыҙын асһа, үпкәһе күренеп тора. Шул һыны менән ... һайлау ваҡытында япа-яңғыҙ үҙе миңә ҡаршы ҡул күтәрҙе.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Иҫтәлек өсөн таш, гранит һ. б. нәмәнән ҡойоп яһап ҡуйылған нимәнеңдер кәүҙәһе. *Арыҫлан һынын яһау.* ■ *Бәләкәй генә баҡсаға боролабыҙ. Беҙҙе таш һалдат һыны ҡаршы ала.* Ә. Ихсан.

**4.** *-ған* формаһындағы үткән заман ҡылым менән килеп, эш-хәлдең башҡарылыу рәүешен белдерә. *Бейегән һыны. Әсәһе булып ҡыланған һыны.* ■ *Ғөбәйҙулланың ауылдан сығып китеүенә байтаҡ ваҡыт үткән .. Әле ҡайтып төшкән һыны.* Р. Солтангәрәев.

**5.** *диал.* Төп, ныҡ. *Тәүәтәйҙән һын башҡорт.*

♦ **Ай һынды** бик шәп, бик матур. **Һын биреү** буйһоноу. *[Һәүбән:] Гөбөрләнән олпатлы атаңа һын бирмәмен.* «Аҡбуҙат». **Һын булыу** шәп, матур булып, көнсөллөк уятыу. *[Эткол бай Новалихинга:] Мәжлесебеҙҙең күрке өсөн, дошмандарға һын булһын өсөн, шуларҙың намыҫын аяҡ аҫтына йығыр өсөн, булмаһа бер йөрөп алаһыңмы?* Һ. Дәүләтшина. **Һын китеү** иҫ китеү. **Һын ҡатыу** иҫте, тойғоно юғалтыу. *Һыны ҡатып илай. Һыны ҡатып көлә.* ■ *Ҡыҙҙар бергә килә, .. юҡҡа барға ла бер килке көлөп һындары ҡата.* Ш. Бикҡол. *Ер сигенә сыға алмай һыныбыҙ ҡатып; беҙ башҡорттар, ерһеҙ ҡалдыҡ бөгөн ятып.* «Бабсаҡ менән Күсәк». **Һын ҡороу** аптырауы, иҫ китеү. *Юҡҡа һының коромаһын, ул да булдымы әҙәм.* **Һыны ҡороған мыҫҡ.** шәп инде, килешкән инде, тигән мәғәнәлә әйтелә. **Һын теймәү** оҡшатмау, күңелгә ятмау. *Тәү күргәндән үк һыным теймәне шул кешене.*

● *Яуға һыйынма — һының ҡатыр.* Әйтем. *Әҙәм тиһәң һыңы юҡ, ҡурҡә тиһәң йөнө юҡ.* Әйтем.

**ҺЫН** [2] *и.* Күҙәтеүҙән барлыҡҡа килгән бер фекер; һынамыш. *Ғәмиләнең: «Эскән кешенең теле лә, аҡса янсығы ла тиҙерәк сиселә»,— тигән, үҙенең күп һынаған яҡшы һыны бар.* Б. Бикбай.

**ҺЫНАҒАС** *к.* Төп-төҙ, туп-тура булып, хәрәкәтһеҙ ҡатып ҡалған кешегә әйтелә. *Ҡулым һынағас кеүек. Һынағастай ҡатыу.*

**ҺЫНАЛЫУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **һынау** [1] *Һыналған яңы машина.*

**2.** Эш-тормош барышында беленеү. *Һыналған кеше.*

● *Ат айҙа һынала, әҙәм йылда һынала.* Мәҡәл. *Ат — юлда, ир яуҙа һынала.* Мәҡәл. *Сәсән — дауҙа, батыр яуҙа һыналыр.* Әйтем.

**ҺЫНАЛЫШ** *и.* Һынау өсөн үткәрелгән сара. *Һыналышта алдынғылыҡ күрһәткән һыбайлыларҙы бер урынға йыйнап алған Ҡаһым түрә.* Ғ. Сөләймәнов.

**ҺЫНАМАҠЛЫ** *с.* Һынау рәүешендәге. *Һынамаҡлы ҡараш.*

**ҺЫНАМСЫ** *и. диал.* Күрәҙә, баҡсы.

**ҺЫНАМСЫЛ** *с. диал.* Һынсыл.

**ҺЫНАМАҠ** *и.* Һынау өсөн эшләнгән сара, эмәл. *Һынамаҡҡа әйтеү. Һынамаҡ өсөн.* ■ *Иштуған ахыр килеп, һынамаҡ өсөн йәштәр көсө менән концерт ойоштороорға булды.* З. Биишева.

● *Ир һынамаҡ бер бурыс.* Әйтем.

**ҺЫНАМЫШ** *и.* Халыҡта һаҡланып, быуындан-быуынға күсеп килгән тәбиғәт күренештәре, йәшәү, тормош тәжрибәһе һ. б. тураһындағы күҙәтеүҙәр. *Һынамыш жанры. Һынамыштар йыйыу. Боронғолар беҙгә күп һынамыштар ҡалдырған.*

**ҺЫНАМЫШЛЫ** *с.* Күпте күреп һынаған; тәжрибәле. *Һынамышлы ҡараш. Һынамышлы булыу.*

**ҺЫНАТЫУ** *к.* **1.** *йөкм. ҡар.* **һынау** [1].

**2.** Кемдер алдында үҙеңде кире, йомшаҡ яҡ менән күрһәтеү; һыр биреү. *Уҡыуҙа һынатыу. Эштә һынатмау.* ■ *[Зәки — Ғатауллинга:] Миңә ышан һин, мин бер ваҡытта ла һынатмам.* С. Агиш. *Ҡырыҫбай үргейҙән ҡурҡа башлай, шулай ҙа һынатырға теләмәй, әйелеп таш ала ла: «Бына ошо ташты ҡыҫып ут сығара алам, һин шуны эшләй алаһыңмы?» — ти* (Әкиәттән).

● *Ҡунаҡ, китәм, тип, һыйлата; хужа, китмә тип, һыната.* Мәҡәл.

**ҺЫНАУ** [1] *к.* **1.** Нимәнеңдер берәй сифатын, яраҡлығын белеү өсөн тәжрибә үткәреү. *Машинаны һынау.* ■ *Оҫта һәр осраған ташты, ҡомдо һынап ҡараған.* З. Биишева. *Ҡамыр батыр .. атаһынан икенсе суҡмар ҡойҙортоп алған, һынап ҡарағас, быныһын ярарлыҡ тапҡан* (Әкиәттән).

**2.** Ҡарап, күҙәтеп, кемдең йәки ниҙеңдер ҡылыҡ-тәбиғәтен асыҡлау. *Дуҫты һынап ҡарау. Һынап йөрөй.* ■ *[Карт:] Балыҡ ҡыҙ балаларҙан ҡурҡмай ул .. Әллә нисә һынағаным бар, ҡурҡмай ул ҡыҙҙарҙан.* Һ. Дәүләтшина.

● *Ҡунаҡ аҙ ултырыр, күп һынар.* Әйтем. *Һынамай алма, һынамай барма.* Әйтем.

**ҺЫНАУ** [2] *и.* **1.** Нимәнеңдер берәй сифатын, яраҡлылығын билдәләү, белеү өсөн үткәрелгән тәжрибә. *Бойҙайҙарҙың сығышы түбәнерәк булыуын күрһәтте һынау.* Б. Бикбай.

**2.** Үҙләштергән белемде билдәләү өсөн алынған һорау. *Һынау биреү. Һынау тотоу. Һынау алыу. Яҙғы һынау. Көҙгө һынау.* ■ *Профессорҙы ҡаты кеше тиҙәр, ни эшләтер һынау көндәрҙә?!* Ғ. Амантай. *Нисә ҡабат инде һынау бирәм, тәүге ҡабат һымаҡ һәр һынау.* Р. Ғарипов.

**3.** Тормоштағы эштәге ҡыйын хәл, ауыр кисереш. *[Фәсхи:] Беләм һеҙҙең өлөшкә лә ауыр һынау төштө. Ләкин ирмен тигән ирҙәр уға ғына бирешмәй.* Й. Солтанов.

**ҺЫНАУЛЫ** *с.* Ентекле, күҙәтеп, һынап ҡараған (ҡарашҡа ҡарата). *Һынаулы ҡараш.*

**ҺЫНАУСЫ** *и.* Ниндәйҙер машинаны һынау менән шөғөлләнеүсе. *Һынаусы летчик. Һынаусы булыу.*

**ҺЫНАШ** *и.* Кемдең кем, ниҙең ни икәнен билдәләгән һынау. *Ер шарында бөйөк һынаш тора, алда әле бик ҙур дауҙар бар.* Ғ. Сәләм.

**ҺЫНАШЫУ** *к.* Үҙ-ара бер-береңде нимәләлер һынау. *Көс һынашыу.*

**ҺЫН-БУЙ** *и. йыйн.* Һын һәм буй; кәүҙә. *[Гөлнур:] Укытыусы кешегә оҙон толомло сәс килешә ул. Йөҙөнә, һын-буйына ла үҙенә бер һомғоллоҡ бирә.* М. Тажи.

**ҺЫНДЫРТЫУ** *к. йөкм. кар.* **һындырыу** 1, 2. *Таяҡты һындыртыу.*

**ҺЫНДЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **һындырыу** 1, 2. *Һындырылған ҡаршылыҡ.*

**ҺЫНДЫРЫУ** *к.* **1.** Ҡаты нәмәне бөгөп, шаҡарып һуғып, өлөшкә айырыу. *Таяҡты һындырыу. Сурт һындырыу.* ■ *Ҡороған ағас ботаҡтарын һындыра-һындыра, йәш ағастарҙы бөгә-бөгә ҡайҙалыр киттем.* Б. Ишемғол. *[Ғәйни:] Нишләп был тиклем тейәп, ҡусәр һындырып, таң эсе менән яфаланаһың.* Т. Йәнәби. / Һөйәкте сатнатыу, биртендереү. *Аяҡты һындырыу. Билде һындырыу.* / *диал.* Бүлеү (икмәкте). *Икмәк һындырып ашау.*

**2.** *күсм. һөйл.* Еңеп, үҙ яғыңа ыңғайлатыу; бөгөү. *[Туҡтамышев:] Ырыҫҡолдо бөгөн һындырһаҡ, ике ҡуян бер юлы тотоласаҡ.* Б. Бикбай. / Кешенең эске көсөн ҡаҡшатыу; имгәндереү. *Кешенең күңелен һындырыу. Рухын һындырыу.* ■ *Мохтаж тормош .. Ғиниәт кеүек көслө ихтыярлы егетте һындыра алманы.* «Ағиҙел», 1964, Ү5.

**3.** *күсм.* Йылытыу (көнгә ҡарата). *Көндәр саҫҡауланып торҙо ла, ҡапыл һындырҙы.* Я. Вәлиев.

◆ **Башына сүп** (*йәки* **таяҡ**) **һындырыу** кешенең элек ҡыланмаған яҡшы бер ҡылығын күргәндә хуплап, артабан да шулай булһын, тигән теләк менән әйтелә. **Тоткан ерҙән һындырыу** күп уйламай ҡәтғи рәүештә хәл итеү. *Район ер бүлеге мөдире Хәлилов ҡыҙыу холоҡло кеше. Тоткан ерҙән һындырырға ярата.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 30 июль. **Һыйыр мөгөҙөн һындырырлыҡ** (һыуыҡ) ныҡ һыуыҡ.

● *Яман ат тәртә һындырыр.* Мәҡәл. *Эш белмәгән ҡорамал һындырыр.* Мәҡәл.

**ҺЫНЛАНДЫРЫУ** *к.* Әҙәбиәттә, сәнғәттә ниҙелер асыҡ, йәнле итеп күрһәтеү; һүрәтләү. *Ғ. Дәүләтшин ярлы крәҫтиән Өмөтбай, коммунист Юлдыбаев кеүек социаль характерҙарҙы һынландыра.* «Ағиҙел», 1968, № 12.

**ҺЫНЛАНЫУ** *к.* Әҙәбиәттә, сәнғәттә һ. б. асыҡ, йәнле рәүештә сағылыу; һүрәтләнеү. *Балладала йыр образы, шиғри ижад темаһы үлемһеҙлек темаһы менән айырылғыһыҙ бер бөтөн итеп һынлана.* Ә. Хәкимов. *Алыҫ үткәндәргә баҡҡайным, күҙ алдында ҡапыл һынландың.* А. Игебаев.

**ҺЫНЛАУ** *к. диал.* Хур итеү.

**ҺЫНЛЫ** **1.** *с.* Матур, һылыу кәүҙәле. *Яуға сыҡмау телһеҙ ҡол булып ҡалыу менән бер; һынлы буй, тән үҫтереп, боҫоп ҡалыу менән бер.* М. Хәй.

**2.** *бәйл.* Ҡәҙәрле, хәтле, тиклем. *Буре һынлы эт.* ■ *Эшең өсөн бер һарыҡ, тигәс, мин ырғып төштөм. Һарыҡ һынлы һарыҡ кеҫәне тишмәҫ.* Т. Килмөхәмәтов. *Ҡайҙа йөрөй икән шул һынлы.* Б. Бикбай.

◆ **Һынлы сәнғәт** ысынбарлыҡты яҫылыҡта йәки күләмле итеп һүрәтләү сәнғәтенең (живопись, графика, скульптура) дөйөм атамаһы.

**ҺЫНСЫ** *и.* Күп һынап, күпте белеп, төрлө эш-хәлде алдан күрә белгән кешегә ҡарата. // *Сайыр ауылында бер һынсы әбей була. Ул элек-электән: «Һеҙҙең ауылығыҙҙы яу баҫыр»,— тип әйтә килгән* (Хикәйәттән).

**ҺЫНСЫЛ** *с.* Күреп, һынап, тиҙ белеүсән, алдан күреүсән. *Нимәләр һиҙә беҙҙең һынсыл ҡарт, ләкин был турала ауыҙ асырға урынһыҙ һанай.* Б. Бикбай. *Был бабай һынсыл була: «Елегә ҡара ҡор төштө, яу килергә тейеш»,— ти* (Хикәйәттән). / Кешенең төҫ, ҡиәфәтенә ҡарап ҡылығын белә торған. *Һынсыл әбей. Һынсыл булыу.*

**ҺЫНСЫЛАУ** *к.* Һынап, алдан күреп әйтеү.

**ҺЫНТАШ** *и.* Таштан яһалған боронғо һын.

**ҺЫНҺЫҘ** *с.* Буй-һыны килбәтһеҙ, төҫ-башы ныҡ йәмһеҙ. *Һынһыҙ кеше.* / Әрләгәндә әйтелә. *[Фәҙелниса:] Кит, һынһыҙ, мин һиңә ниндәй Галя булайым да, ҡайҙан еңгә тағы?* Н. Мусин.

**ҺЫН-ҺЫПАТ** *и. йыйн.* Кешенең тышҡы ҡиәфәте, буй-һыны, төҫ-башы. *[Таймаҫ — Юлдыбайға:] Нишләп һин шул ҡатынды алдың, әйт әле? Ул һыны-һыпаты менән һиңә ҡул кеше түгел.* Һ. Дәүләтшина.

**ҺЫНЫҒЫУ** (һыныҡ*ғ*) *к.* Эшләмәй йөрөп эшләгәндән ҡаҡшап, тән ныҡ ауыртыныу. *Тән һынығыу.* ■ *Өмәнән һуң тән һыныҡып тора.* С. Кулибай.

**ҺЫНЫҠ** *с.* **1.** Һынып боҙолған; сатнаған, кителгән; бөтөн түгел. *Һыныҡ бысаҡ. Һыныҡ салғы.* ■ *Ул [бригадир] ишек төбөнә еткәс, түпһаға һырты менән ҡағылған һыныҡ ураҡҡа табандарын тырышып ҡырҙы.* Б. Бикбай.

**2.** *и. мәғ.* Һынған киҫәк, һынған бер өлөш. *Таҡта һыныҡтары. Металл һыныҡтары йыйыу.* ■ *Шәрәфи казематтың һәр булкәһен, һәр мөйөшөн тикшерҙе, ләкин .. бер тимер һыныҡы ла таба алманы.* И. Насыри.

**3.** *и. мәғ.* Икмәктең бүлеп алған бер киҫәге. *Икмәк һыныҡы. Бер һыныҡ икмәк.* ■ *Хәлһеҙләнгән йөрәк дауа һорай. Ҡайҙа һыныҡ, ҡайҙа йотом һыу?!* Ғ. Амантай.

◆ **Һыныҡҡа һылтау** *кар.* **һылтау** [2].

**ҺЫНЫҠ-МЫНЫҠ** *и. йыйн.* Төрлө ҡалдыҡ-боҫтоҡ икмәк.

**ҺЫНЫЛЫШ** *и.* Йәмғиәттә, тормошта булған киҫкен үҙгәреш. *Тарихи һынылыш. Һынылыш яһау.* ■ *Нисек кенә булмаһын, ошоға кәҙәрге гәмһеҙлекте ташлап, үҙ тормошомда ҡырҡа һынылыш яһарға тейешмен.* Ә. Әлибаев.

**ҺЫНЫУ** *к.* **1.** Бөгөлөү, шаҡарылыу, һуғылыу арҡаһында өлөшкә айырылыу (ҡаты нәмәгә ҡарата). *Һынған көрәк. Теше һынған һәнәк.* ■ *Ботағы һынған алмағастар, башы мөнтәлгән сейәләр нигәләр бойоғоп ҡалған һымаҡ.* З. Биишева. *Ҡулыңдағы ҡылысың әй һынмаһын, алдарыңдан дошман уҙмаһын* (Халыҡ йырынан). / Сатнау, биртенеү (һөйәккә ҡарата). *Һынған ҡул. Ҡанаты һынған ҡош.* ■ *Быса-быса ҡул ҡабарып бөттө, бил һына яҙҙы* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Ҡыҫымға түҙмәй еңелеү. *Һынған кеше.* / Рухи йәһәттән ҡаҡшау, имгәнеү. *Үҙемдең һынды күңелем, ыуалды селпәрәмә.* С. Ҡудаш.

**3.** *күсм.* Ныҡ ҡаты һыуыҡ йомшарыу. *Ғинуар һыуығы һынды.* ■ *Һынды һыуыҡ. Яҙ һулышы ергә нисек бөркөлә!* Ғ. Дәүләтов.

♦ **Ҡанат һыныу** көс, ҡәүәт бөтөп, сараһыҙ булыу. *Ҡалғандыр сит илдә ятып, бәлки, ҡанаттары һынған дуҫтары...* М. Кәрим.

● *Ҡатыным үлде — ҡамсымдың һабы һынды.* Әйтем. *Һыртың һынһа ла сер бирмә.* Әйтем.

**ҺЫҢАР** *и.* Ишле, ҡуш нәмәнең береһе. *Бейәләйҙең һыңары.* // *Һыңар балаҡ. Һыңар күҙ. Һыңар тәртә. Һыңар ҡул.* ■ *Ата ҡаҙҙар, тап шул саҡтағыса, һыңар аяҡтарына баҫып, һаҡта тора.* З. Биишева. *Итекте алып ҡайтып, икенсе һыңары менән бергә ҡуялар* (Әкиәттән). **Һыңар яулыҡ** *этн.* Ҡуш яулыҡтың береһе.

**ҺЫҢАРАЯҠ** *и. диал.* Мүк еләге.

**ҺЫҢАРЛАУ** *ҡ.* Ишле нәмәнең береһен ҡулланыу. *Агиҙелгә мин төшәмен һыңарлап һыу алырға* (Таҡмаҡтан).

**ҺЫҢАРСАЙ** *и. диал.* Сәтәкәй.

**ҺЫҢҒАҘАУ** *ҡ. кар.* **һеңгәҙәү.**

**ҺЫҢҒЫРЛАҠ** *с.* Танау аша һөйләшкән; һиңрәү, тыңҡыш. *Һыңғырлаҡ кеше. Һыңғырлаҡ булыу.*

**ҺЫҢҒЫРЛАУ** *ҡ.* **1.** Тауышты танауҙан сығарған һымаҡ һөйләү. *Ул [ағай] һыңғырлап, әкрен генә һөйләй ҙә һөйләй.* Р. Солтангәрәев.

**2.** *күсм.* Ризаһыҙлыҡ менән ауыҙ эсенән һөйләнеү. *Һыңғырлап маҙаға тейеү.*

**ҺЫҢҠ** *оҡш.* Кешенең күкрәк төбөнән ҡалтыранып, бүленеп-бүленеп сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Һыңҡ итеп ҡалыу. Һыңҡ итеп килеп төшөү. Һыңҡ итеп барып бәрелеү.*

**ҺЫҢҠ-ҺЫҢҠ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат һыңҡ иткән тауыш. *Һыңҡ-һыңҡ итеп илау. Һыңҡ-һыңҡ итеү.* ■ *Альберт һаман һыңҡ-һыңҡ килеп илай ине.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҺЫҢҠЫЛДАТЫЫУ** *ҡ.* Һыңҡ иттереү, һыңҡ-һыңҡ иттереү. *Өлкәмән Ялайҙың яурынына һыңҡылдата һуҡты.* Ш. Насыров.

**ҺЫҢҠЫЛДАУ** *ҡ.* Һыңҡ итеү, һыңҡ-һыңҡ итеү. *Ямал һыңҡылдап илап ебәрҙе.* М. Тажи.

**ҺЫПАЙТА:** **һыпайта күлдәк** тотош итеп тегелгән билһеҙ күлдәк.

**ҺЫПАЛЫ** *с. диал.* Ҡылыҡһыҙ.

**ҺЫПАТ** *и.* Ҡиәфәт, төҫ. *Асыулы һыпат.*

**ҺЫПАТЛЫ** *с.* Матур төҫ-ҡиәфәтле. *Һыпатлы кеше. Һыпатлы булыу.*

**ҺЫПАТҺЫҘ** *с.* Йәмһеҙ төҫ-ҡиәфәтле, төҫкә-буйға ҡилбәтһеҙ. *Һыпатһыҙ әҙәм.* ■ *Бигерәк тә һыпатһыҙ бит әле ул маймыл тигәндәре.* З. Биишева. *[Вилис] һыпатһыҙ оҙон кәүҙәһен эйеп, приставты ла, ҡатынын да байрам менән ҡотланы.* Ж. Кейекбаев.

**ҺЫПТАҒАЙ** [1] *с.* **1.** Ботаҡһыҙ нәҙек оҙон ағас; һырғый. *Һыптағай ағас.*

**2.** *күсм. һөйл.* Тотош итеп тегелгән, билһеҙ (күлдәккә ҡарата). *Өлкән йәштәге ҡатын-ҡыҙ һыптағай күлдәк кейә.*

**ҺЫПТАҒАЙ** [2] *р.* **1.** Әшһеҙ, буштан-буш. *Һыптағай йөрөү.*

**2.** Бер нәмәһеҙ, буш. *Йәштән күкрәгемә һеңешкән асыуым, тик шул байҙарға сапҡан намыҫым — ул бәрелешһеҙ, һыптағай ғына ҡалмаҫ.* Т. Хәйбуллин.

**ҺЫПТЫРТЫУ** *ҡ. диал. кар.* **һыпыртыу** 4.

**ҺЫПЫ** *и. диал.* Суфый. **Һыпы һуған еймәҫ, күрһә тамырын да ҡуймаҫ** ғәмәлдә суфый булмаған, ә суфый булып ҡыланған кешегә мыҫҡыллап әйтелә.

**ҺЫПЫЛЫУ** *ҡ. диал.* Һүтелеү. *Еңе һыпылып сыҡты.*

**ҺЫПЫРТМА** *с. диал.* Һепертмә.

**ҺЫПЫРТМАҠ** *и.* Һыпырылып торған ҡоҡанлы бау. *[Нәфисә — әсәһенә] үлтерегеҙ, үңәсемә һыпыртмаҡ һалып быуығыҙ. Уға кейәүгә бармайым.* Я. Хамматов.

**ҺЫПЫРТМАҠЛАУ** *ҡ.* Һыпырылып тормалы итеү. *Һыпыртмаҡлап бәйләү.*

**ҺЫПЫРТЫУ** *ҡ.* **1.** *йөкм. кар.* **һыпырыу.** *Арҡаны һыпыртыу.*

**2.** Ныҡ итеп һыпырыу, тейҙереү. *Ысыҡлы үлән өҫтөнән итек менән һыпыртып атлауға Сөнәгәттең аяҡ юлы ярылып ҡала барҙы.* Ж. Кейекбаев.

**3.** *күсм.* Көслө итеп өрөп туҙҙырыу; ойоҡһотоу. *[Бабай:] Тышта буран сыҡҡан, иллә һыпырта* (Әкиәттән).

**4.** *күсм.* Бик йәһәтләп, ашығып юл алыу; елдереү. *Өйгә һыпыртыу. Йәйәү һыпыртыу. Һыпырта атлау.* ■ *Егет күп уйлап торманы, .. Алманың юлын арҡыры сыҡмаҡсы булып, тураға һыпыртты.* Ҡ. Ибәтуллин. / Бик йәһәтләп ҡасыу. *Айыу артына ла боролоп ҡарамай, урманға һыпыртҡан* (Әкиәттән).

**5.** *күсм. һөйл.* Ҡабаланып, күп итеп ашау. *Һәр ҡайныһы .. өҫтәлдәге бай ашамлыҡты һыпыртырға тотонодо.* Я. Хамматов.

**ҺЫПЫРЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. кар.* **һыпырыу** [1—5]. *Түбән һыпырылған йылтыр итек кейгән .. ине был кеше.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Ябылған, кейелгән ерҙән аҫҡа шылыу, сиселеү. *Ул [Фатима] башынан һыпырылып төшкән йоҡа шәлен һыңар ҡулы менән .. бөрөп тотҡан.* Б. Бикбай. *Егеттең йылан тиреһе шауҙырлап көлдөксәгә һыпырыла ла төшә* (Әкиәттән).

**3.** Тотош бер юлы ҡубып йәки һурылып, түбәнгә шылыу. *Һылаған балсыҡ һыпырылып төшкән.* ■ *Шәмсекәмәр апайҙың ҡулындағы бала .. ҡулынан һыпырылып төшөп китә яҙҙы.* К. Кинйәбулатова.

**4.** *күсм.* Күмәкләп тотош бер юлы ҡуҙғалыу. *Һыпырылып сығып китеү.* ■ *Ирҙәр, егеттәр бер нисә көндә һыпырылып сығып киткәс, Ахун ауылы йәтимһерәп, ҡотһоҙланып ҡалғандай булды.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 27 сентябрь.

**ҺЫПЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡул менән ниҙәңдер өҫтөнән үткәреү; һыйпау. *Арҡанан һыпырыу. Сәсте арҡа һыпырыу.* ■ *Зилский эре генә итеп, мыйығын һыпырып ҡуйҙы.* Ғ. Дәүләтшин. *Мин сикәмде һыпырып ҡараным, ҡулыма ҡан буялды.* Ш. Насыров. / Ни менәндер өҫтән үткәреп, ышырыу. *Гөлйөҙөм сәселгән онд о усы менән ҡоштабаҡҡа һыпырып, әсәһенә бирҙе.* Һ. Дәүләтшина. / Ни менәндер өҫтән үткәреп, таҙартыу; һөртөү. *Биттәге саңды һыпырыу.* ■ *Аш бешереп*

*маташкан ҡатын әҫегә тирләгән битен алъяпкысы менән һыпырҙы.* Я. Хамматов.

**2.** Ябылған, кейелгән нәмәне бер юлы систереү, алыу. *Аттың йүгәнен һыпырыу. Баштан бүректе һыпырып алыу. Өҫтән юрғанды һыпырып ташлау.* ■ *[Зарема] аҡ яулығын һыпырып алды ла, кәмәнең артына — ағымға ырғытты.* Ф. Иҫәнғолов. *Ул [Ҡәләмбай] менгән атын һыпырып ебәрҙе лә, яҡындағы бесән кәбәнен өшәләклән эсенә инеп ятты.* Т. Хәйбуллин. *[Күсәк] Ҡөлөмбәттең кейемен һыпырып алды.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**3.** Иңләп, бөтәһен бергә күн итеп тиреү. *Еләкте һыпырып тиреү.* ■ *Сәскәләрен һыпырып сәйгә һалам, шау бал булып аңҡый сәйҙәрем.* Р. Бикбаев.

**4.** *күсм. һөйл.* Тотош бер ыңғайҙан, бөтәһен бер юлы ҡырҡыу йәки сабыу. *Урманды һыпырыу. Механизаторҙар баҫыу артынан баҫыуҙы һыпыралар.*

**5.** *күсм.* Бер нәмә ҡалдырмай тотош эләктереү. *Шәмсун бөтә аҡсаны һыпырып алып сығып китте.* Н. Мусин.

**6.** *күсм.* Бик йәһәтләп, ашығып юл алыу. *Өйгә һыпырыу.* ■ *Һуңғы дәрес тамамланыу менән малайҙар ауылға ҡарай һыпырҙы.* Р. Низамов.

**7.** *күсм.* Ҡабаланып, ҡалдырмай ашау. *Улар колбаса менән аҡҡаласты .. һыпырып ултыралар.* Ә. Бикчәнтәев.

◆ **Тир һыпырып эшләү** бик тырышып, ихлас эшләү. *Иртәгәһен көн шундай аяҙ булып тыуҙы, тир һыпырып бесән йыйыр ваҡыт.* Т. Сәғитов. **Ыңғайға һыпырыу** кешегә ҡаршы өндәшмәй, ыңғайына, яйына тороу. *Шәйхи карт Мусаға ҡаршы бер һүҙ ҙә әйтә алмай.., ыңғайға һыпырып ҡына тора.* Ш. Насыров. **Һыпыра һуғып** 1) етеҙ, тәүәккәл рәүештә эш итеү. *Һыпыра һуғып сығып китеү;* 2) ҡыйрата, емерә һуғыу. *Ваҡытлы хөкүмәттең үҙен дә һыпыра һуғып төшөрөп ырғыттылар.* Һ. Дәүләтшина. **Һыпырып алғандай булыу** бер эҙһеҙ, бөтөнләй бөтөү (көберәк ауырыуға ҡарата). *Башым ауыртыуы һыпырып алғандай булды.*

**ҺЫПЫШ** *с. диал.* Шамтыр.

**ҺЫР** [1] *и.* **1.** Ағас һ. б. ҡаты нәмәләргә уйып, соҡоп яһаған биҙәк. *Һыр һалыу. Һыр яһау.* ■ *Йорттоң матур һырҙар менән эшләгән балкондарын үрмәле гөлдәр сорнаған.* Ф. Иҫәнғолов. *Беҙ төрлө һырҙар яһап эшләнгән тимер баҫҡыстан өҫкә менеп киттек.* С. Агиш. / Бояп йәки сигеп төшөргән биҙәк. *Һыр һалыу.* ■ *Ҡалпаҡайымдың ай һырҙары, ваҡ һыр менән уны һырлайҙар* (Халыҡ йырынан).

**2.** Бер буйы соҡорланып, бер буйы һырланып торған буй-буй һыҙат. *Һыйырҙың йәше мөгөҙ һырынан билдәле.*

**3.** Кешенең битендәге буй-буй һыҙыҡ; йыйырсыҡ. *Маңлый һырҙары.* ■ *Күкрәп уҙған йылдар эҙе булып, маңлайҙарҙа һыҙылып һыр ҡала.* А. Игебаев.

**ҺЫР** [2] *и.* **1.** Терегөмөш эсемәһе. *[Сейәбикә:] Теше тәкәт таптырмай һыҙлай, шуға ҡара ҡытат яһатып, һыр төтөнөнә тотайым тигәйнем.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Көҙгө яһай торған йылтыр бояу.

**ҺЫР** [3] *и.* Тәнгә ҡыҙыл булып сабыртып сыҡҡан яман шеш; һырҡыуат. **Ҡыҙыл һыр** ҡыҙыл булып сабыртып сыҡҡан яман шеш.

**ҺЫР** [4]**: һыр бирмәү** кемдер алдында үҙеңдең кире йәки йомшаҡ яғыңды күрһәтмәү; һынатмау. *Һин бит бәләсник кеше түгелһең, тим әбейгә. Кеше алдында үҙең дә һыр бирмә, мине лә оятҡа ҡалдырма.* Н. Мусин.

● *Һере кеше һыр бирмәҫ.* Әйтем. *Һының китһә лә һыр бирмә.* Әйтем. *Һыр биргәнсе һыртыңды бир.* Мәҡәл.

**ҺЫРА** [*фарс.*] *и.* Арпа ҡуры менән эсетеп яһаған эсемлек. *Һыра заводы. Һыра ҡайнатыу.*

**ҺЫРАСЫ** *и.* Һыра ҡайнатыусы.

**ҺЫРАХАНА** *и.* Һыра эсә торған бина. *Һатыусы малайҙарын ул [Алдар] һыраханаға алып инә. .. Шунда уҡ бик күп һыра килтерәләр.* (Әкиәттән).

**ҺЫРБАБА** *и. диал.* Бабасыр.

**ҺЫРГҮҘ** *и.* Һырты ҡара көрәнһыу, башы ҡыҙыл көрән, күҙе аҡ төҫтәге ваҡ өйрәк.

**ҺЫРҒА** *и.* **1.** Ҡолаҡ йомшағына таға торған түңәрәк йәки һалбырап торған биҙәнеү нәмәһе; алҡа. *Алтын һырға. Көмөш һырға. Ҡашлы һырға. Һырға тағыу.* ■ *[Әминә:] Ҡолаҡтарыма һырғалар таға инем, башымда ап-аҡ батист яулыҡ була торғайны.* Н. Асанбаев. / *күсм.* Ҡайһы бер кәзәнең тамағы аҫтында һалбырап торған үҫентеһе. *Һырғалы кәзә.*

**2.** *күсм.* Ҡайһы бер ағастың һалынып торған сәскә бөрөһө. *Ерек һырғаһы. Ҡайын һырғаһы.* ■ *Уларға [кыҙҙарға] ерек һырғалары ла яңы ғына сыҡҡан ыуыҙ ғына үренделәр ҙә, бөрөләр ҙә, ҡара көртмәле лә, бөлдөргән дә, артыш емеше лә аҙыҡ була.* Ғ. Ишбулатов.

**3.** Тәңкә теҙелгән суҡлы муйынсаҡ. *Һырға тағыу.*

**4.** *диал.* Ҡыуал. *Һырғаға менеү буйынса ярыш.*

◆ **Һырға ауырыуы** ҡолаҡ артына иҙелеп, сейләнеп сыҡҡан сир. **Һырға туйы** *этн. ҡар.* **туй.** *Һырға туйында егет ҡулына һырғаны алып, ҡыҙҙың ҡолағын тешләп, ҡолағына һырға кейҙерә.* М. Буранғолов. **Һырға һабағы** *этн.* йола буйынса борон бәләкәй ҡыҙҙың ҡолағын тешләтеп, ҡоҙа булышҡанда малай яғынан биргелгән бүләк (ғәҙәттә тәңкә биргәндәр). *Һырға һабағы биреше.* ■ *[Таһыл:] Ҡоҙалашыу йолаһы буйынса, ҡыҙ атаһы булған бей атама бирерһегеҙ һырға һабағы.* Х. Ғәбитов.

**ҺЫРҒАЙ** *с. диал.* Һырғый. *Һаҡта торам һаҡлап ил сиген .. һырғай аҡ ҡайындар, ҡарағайҙар сайҡалалар тирә-яғымда.* Б. Вәлит.

**ҺЫРҒАҠ** [1] *и.* Тотош һабағы менән бергә йәбешеп һырый торған оҙонса ваҡ япраҡ орлоҡло үлән; һырлан. *Күк һырғаҡ. Кейемгә һырғаҡ һырыған.*

**ҺЫРҒАҠ** [2] *с.* **1.** Һырып, йәбешеп тороусан. *Һырғаҡ ҡар.* ■ *Уйнай-уйнай килеп һырғаҡ буран өй түренә килеп һырлыға.* Т. Йәнәби.

**2.** Тәнгә үтерлек көслө, әсе. *Яланда һырғаҡ ел тәнде утәнән-утә һукты.* М. Тажи. *Әсе генә буран, ай һырғаҡ ел, эйләндереп булмай йылҡымды* (Халыҡ йырынан).

♦ **Бүре һырғағы** марттың егермеһе тирәһендә була торған көслө епшек буран; март бураны; аҡман-тоҡман. *Һырма буран был, бүре һырғағы. Шундай буранда туйлап йөрөйҙәр ул бүреләр.* Ғ. Ғүмәр.

**ҺЫРҒАЛАҠ** *и.* Сана шыуып уйнай торған ҡалҡыу урын. *Һырғалаҡ яһау. Һырғалаҡ эйеү.*

**ҺЫРҒАЛАНЫУ** *ҡ.* Кемдер эргәһендә уралыу, уның янынан китмәү. *Әсә янында һырғаланыу.*

**ҺЫРҒАЛАУ** [1] *ҡ.* Шыуып, ситкә тайыу; кәйелеү.

**ҺЫРҒАЛАУ** [2] *ҡ.* Ниҙеңдер өҫтөнән буйлап, түбәнгә һырҡырау. *Шатлыҡтан да, һағыштан да шулай күҙ йәштәре аға һырғалап.* **М.** Илбаев. *Меҫкен торнаның аҡһыл түшенән һырғалап ҡан аға.* М. Сәғитов.

**ҺЫРҒАНАҠ** *и. диал. ҡар.* **һырғаҡ** [1].

**ҺЫРҒАУЫЛ** *и.* **1.** Байраҡ һ. б. элеү өсөн ултыртылған нәҙек оҙон бағана. *Йыйылған һебәне һырғауылға бәйләп ҡуйҙылар.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Ярыштарҙа үрмәләп менеү өсөн ултыртылған оҙон шыма бағана; баҡан, ҡыуал. *Һырғауыл буйлап үрмәләү.* ■ *Оҙон һырғауылдың башына менеп, таҫтамалын алып төшөүселәр ҙә табылды.* К. Мәргән.

**ҺЫРҒЫ** *и. диал.* Һырғауыл, ҡыуал. *Һырғыға үрмәләү.* ■ *[Батша:] Беренсе шарт: кейәү буларға теләгән кеше түбәһенә тулы стакан бал ултыртып, шуны бер тамсы ла түкмәй, һырғы башына менеп төшөргә тейеш* (Әкиәттән).

**ҺЫРҒЫЙ** *с.* **1.** Оҙон, төҙ, ботаҡһыҙ. *Һырғый ағас.* ■ *Солоҡ һырғый бер йүкә ағасында бик бейектә булған.* Ж. Кейекбаев. *Бер тиҫтер һырғый ҡарағай — саҡ күренә остары.* С. Кулибай. *Ялбыр имән, һырғый ҡарағайҙар бер тамырҙан үҫкән был яҡта.* С. Ғәбиҙуллин. / *күсм.* Нәҙек, оҙон буйлы (кешегә ҡарата). *Һырғый оҙон булыу. Һырғый оҙон ине киленебеҙ.*

**2.** *диал.* Ҡармаҡ һуйылы.

**ҺЫРҒЫН** *и.* Һырыған ҡар; һырынды. *Тал сыбыҡтарында ҡар һырғыны.* М. Ҡулаев.

**ҺЫРҘАЙ: һырҙай ҡан** бик күп ағып, тотош буялған ҡан. *Икенсе ҡулым да яраланды .. Ҡулбаштарым өҙөлөп килә, ҡулдарым һырҙай ҡан, тартҡан йөгөм көс еткеһеҙ ауыр.* К. Кинйәбулатова. *Үгеҙҙен бер тояғы урталайға ярылып, араһына ком тулып, һырҙай ҡанға туҙған, ти.* «Урал батыр».

**ҺЫРҠАТ** *и. диал.* Ыҙғыр ел.

**ҺЫРҠАУ** *и.* Ауырыу, сырхау.

♦ **Ҡара һырҡау** тиф.

**ҺЫРҠАУЛАУ** *ҡ.* Ауырыу, сырхаулау. *Һырҡаулап торам.*

**ҺЫРҠЫРАТЫУ** *ҡ.* **1.** Тамсы-тамсы итеп ағыҙыу.

**2.** *күсм.* Ныҡ әрнетеү. *Йөрәкте һырҡыратыу.*

**ҺЫРҠЫРАУ** *ҡ.* **1.** Әҙләп кенә тамсылап һығылып ағыу. *Һырҡырап ағыу.* ■ *Уның [хәлфәнең] янындағы ҡатындарҙың да күҙҙәренән йәштәре һырҡырап сыҡты.* Ж. Кейекбаев. *Ҡалын бинт үтә йәрәхәтенән күрән ҡан туҡтауһыҙ һарҡып, сикәһе буйлап һырҡырай.* Ш. Янбаев.

**2.** *күсм.* Ныҡ әрнеү, өҙөлөү. *Йөрәк һырҡырай.* ■ *Илап ҡалды бала күҙ тултырып, аслыҡ буранында һырҡырап.* Т. Сөләйманов.

**ҺЫРҠЫУАТ** *и.* Тәнгә ҡыҙыл булып сабыртып сыҡҡан йоғошло сир; һыр.

**ҺЫРЛАҒАС** *и. диал.* Кер тәгәрләткес.

**ҺЫРЛАН** *и.* **1.** Тотош һабағы менән йәбешеп һырый торған ваҡ сәнскеле үлән.

**2.** *диал.* Һырғаҡ, бөргәк.

● *Һырлан һырып алыр, бөрлән бөрөп алыр.* Әйтем.

**ҺЫРЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Һыр төшөрөү, һырлы итеү. *Тәҙрә яңағын һырландырыу.*

**ҺЫРЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **һырлау.** *Һырланған ишек.*

**2.** Һырлыға әйләнеү, һырлы булыу. *Маңлайы хәҙер әллә ни тиклем тәрән йыйырсыҡ менән һырланды.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *күсм.* Һайланып, наҙланып ҡыланыу. *Мин нисек шул тиклем зиннәтле буләктәрҙән баш тарта алайым ти, һырланып торманым.* Х. Зарипов.

● *Бесәй аска һыҙланыр, аш һалдыңмы — һырланыр.* Мәҡәл.

**ҺЫРЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **һырлау.** *Беҙҙең, иптәш баҡсабыҙ бар, иллә һәйбәт, шәп тә һуң, төрлө буяу менән һырлаттыҡ матур рәшәткәһен.* Ш. Бабич.

**ҺЫРЛАУ** *ҡ.* **1.** Уйып, соҡоп һыр яһау, һырлы итеү. *Һырлап, матурлап эшләгән өй емеш баҡсаһы менән уратып алынған.* Б. Хәсән. / Буяп йәки сигеп биҙәк төшөрөү; биҙәкләү. *Өмөгөлсөм хаттың сит-ситен сәскәләр менән һырлаған.* Ғ. Лоҡманов.

**2.** Буй-буй һырлы, һыҙатлы. *Һырлап бәйләгән ойоҡ. Итәген һырлап теккән күлдәк.*

**ҺЫРЛАУЫҠ** *и. диал.* Сырмалсыҡ.

**ҺЫРЛАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **һырлау.**

**ҺЫРЛЫ** *с.* **1.** Һыр [1] менән биҙәүле. *Һырлы һандыҡ.* ■ *Бүлмәнең түрендә аяғы һырлы, өҫтө йәшел буҫтау ҡапланған ҙур өҫтәл.* С. Агиш.

**2.** Киртләс-киртләс. *Һырлы таҡта.*

**ҺЫРЛЫҒЫУ** (һырлыҡ*ғ*) *ҡ. ҡар.* **һырығыу.** *Кешегә һырлығып ултырыу.*

**ҺЫРЛЫҒЫШЫУ** *ҡ.* Күмәк бергә бер-береһенә яҡын килеп бер урынға өйөлөшөү. *Һырлығышып йөрөү. Һырлығышып килеү.* ■ *Улар шулай шаярышып һөйләшә-һөйләшә сисенеп .. оҙон эскәмйәгә һырлығышып ултырҙылар.* Һ. Дәүләтшина. *Бер мөйөшкә һырлығышып бесәй балалары тынып ҡалды.* Й. Мостафин.

**ҺЫРЛЫҠТЫРЫУ** *ҡ.* Бер урынға һыйындырыу (кешеләргә, йәнлектәргә ҡарата). *Балаларҙы мөйөшкә һырлыҡтырып ултыртып ҡуйыу. Һарыҡтарҙы һырлыҡтырып килтереү.*

**ҺЫРМА** [1] *с.* Һырып тегелгән. *Һырма бишмәт. Һырма салбар.* ■ *Кәбир өҫтөнә күпмә бишмәт, һырма салбар кейеп йөрөй.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҺЫРМА** [2] *и.* Һырып тегелгән ҡыҫҡа өҫ кейеме. *Ғәзимә күпшылап тегелгән һырмаһының кеҫәһенә ҡулдарын тыҡҡан да, тәҙрәгә боролоп ҡатҡан.* З. Ғәлимов.

**ҺЫРМА** [3] *и.* Урын буйына йәйә торған ҡорама тар юрған; түр юрғаны; һуҙма.

**ҺЫРМА** [4] *с. ҡар.* **һырғаҡ** [2].

**ҺЫРМА** [5] *и. диал. ҡар.* **һыр** [1].

**ҺЫРМАЛАУ** *к.* Һырып йәбешеү; һырыу. *Кейемгә ҡар һырмалай.*

**ҺЫРМАЛЫ** *с. диал.* һырлы.

**ҺЫРМАУЫҠ** *и. диал. кар.* **һырлан** 1.

**ҺЫРМЕНӘҘ** *с. диал.* Серҙәш. *Һырменәҙ иптәш. Һырменәҙ булыу.*

**ҺЫРНЫҒЫУ** (һырныҡ*ғ*) *к. диал.* ҺырыҒыу.

**ҺЫРПАЛАНЫУ** *к.* Ярамһаҡланып, ярарға тырышып, кемдер тирәһендә уралыу. *Һырпаланып йөрөү.* ■ *Сатаев, үс иткән кеүек, ныгыраҡ һырпалана, урынлы булһа-булмаһа ла, уның менән шаяртып һөйләшергә тырыша.* Н. Мусин. *Эт атлаган һайын һырпаланып ҡойроҡ болгай.* Х. Назаров.

**ҺЫРСЫ** *и. һөйл.* Һыр, биҙәк яһаусы. *Һырсы булыу.*

**ҺЫРТ** *и.* **1.** Йәнлек-хайуандың буйҙан-буй үткән арҡа үҙәге. *Һырт буйы.* ■ *Бына ҡыҙылганаттар, алабугалар .. һыу өҫтөнән һырттарын күрһәтә яҙып, талгын гына йөҙөп үтә.* З. Биишева. / Кәүҙәнең күкрәк менән ҡорһаҡҡа ҡаршы яғы; арҡа. *Һырттан һыйпау.* ■ *Аттың башында алтын йүгән, ти, һыртында көмөш эйәр, ти, үҙе уйнаклап тора, ти* (Әкиәттән). *Шунан Сәмрегош Аҡъял батырҙы һыртына ултыртып алган да, осоп та киткән* (Әкиәттән).

**2.** (*йәки* **тау һырты**) Тауҙың оҙон булып һуҙылған өҫкө буйы. *Урал һырты. Һыртка менеү. Һыртты төшөү.* ■ *Уя эсенән киткән тумалаҡ юл тау башына, һыртка алып менә.* Ж. Кейекбаев. / Бер урындың ҡалҡыуға йәки йылға ағышының ҡаршыһына киткән тарафы; үр. *Мәүлет бай .. ауылдың һыртынараҡ сыгарып һалынган мәсеткә ҡарай йүнәлде.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Ниҙеңдер алғы, йөҙ яғына ҡаршы булған өлөшө. *Бысаҡтың һырты. Ураҡтың һырты.* ■ *Зөләйханың .. ҡул һыртын һыйпап, иркәләп ултыргым килде.* Т. Йәнәбн. / Ниҙеңдер өҫкө яғы, өҫтө. *Итек табанының һыртынан туҙ, туҙ өҫтөнән күн һалына.*

**4.** Ниҙеңдер тышҡы яҡ йөҙө. *Һыртынан һыланган өй.* ■ *Ут ялкындары .. осло телдәрен бөгөп, тагы ла ҡаҙан һыртын ялманы.* Һ. Дәүләтшина. / Ниҙеңдер тыш яғы. *Өйҙө һырттан бикләү.* ■ *[Фәсхи:] Өй былай һырттан ҡарагандa ыҡсым гына.* Т. Йәнәби. *[Бай:] Әле гел тирмәлә ултырып, йонсоп та алдыҡ булһа кәрәк. Бына тирмә һыртына, ана сауыллыҡҡа барып уйнарга мөмкин, әллә булмаһа шунда сыгып ултырабыҙмы?* Т. Хәйбуллин.

**5.** Алыҫтағыраҡ урын; ҡыр, сит. *Һырттан ҡарап тороу. // Батырҙарга ҡандай һүҙ әйтер тип хан, һырт яҡтан тыңлап торҙо халыҡтың бары.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

♦ **Сыҫкан һырт** һырт буйынан ҡара һыҙаты булған ҡола (ат төҫө). **Ҡойроҡто һыртка һалыу** *кар.* **ҡойроҡ. Һырт биреү** *шул уҡ* **арҡа биреү** (*кар.* **арҡа**). **Һырт ҡабартыу** асыуланыу, ҡаршы тороу. *Берәй төрлө яңылыҡ булдымы — Афзал һыртын ҡабартты.* Ғ. Ибраһимов. **Һырт ҡайышын алыу** *кар.* **ҡайыш. Һырт менән тороу** ҡаршы булыу. *[Сурагол:] Былар байҙар ярлы-ябагайҙың һырт менән тороуына, теше-тырнагы менән ҡаршы булыуына ҡарамай, ерҙе һатырга батырсылыҡ итерҙәрме икән ни?* Т. Хәйбуллин. **Һыртын** (*йәки* **һырт һөйәген) һындырыу** *шул уҡ* **арҡа һөйәген һындырыу** (*кар.* **арҡа**).

● *Алдыңды бер ҡара, һыртыңды биш ҡара.* Мәҡәл. *Серен белмәгән малдың һыртынан йөрөмә.* Мәҡәл. *Һыртың һынһа ла сер бирмә.* Әйтем.

**ҺЫРТАҠ** *с.* Һырт буйы аҡ. *Һыртаҡ һыйыр. Һыртаҡ кәзә.*

**ҺЫРТАНЫУ** *к. диал.* Таныу, йәшереү. *[Йәнтимер:] Ә мин, агай-эне, күптән итәкпеҙ ҡалганмын инде, һыртанып булмай.* Ғ. Вәлиев.

**ҺЫРТАШ** *и.* Һыҙғанда ҡыҙыл, һары төҫ сыға торған буяулы таш.

**ҺЫРТҠАЛ** *и. диал.* Арҡалыҡ.

**ҺЫРТҠЫ** *с.* **1.** Ҡалҡыу яҡтағы, һырттағы; үрге. *Һыртҡы урам. Һыртҡы юл.*

**2.** Тыш яҡтағы; тышҡы. *Һыртҡы ямау.*

**3.** *диал.* Артҡы. *Һыртҡы тәгәрмәс.*

♦ **Һыртҡы бисә** һөйәркә.

● *Һыртҡы бисә һыртҡы ямау.* Әйтем.

**ҺЫРТЛАН** [1] *и.* Кеше йәшәмәгән бушлыҡтарҙа көньяҡ далалары һәм сүллектәрендә емтек ашап йәшәгән һөтимәр йыртҡыс йәнлек; сүл бүреһе. *Ялан гына ерҙең эй бүреһе, күк һыртлан да булыр күбеһе* (Халыҡ йырынан).

**ҺЫРТЛАН** [2] *с.* Һырт буйы һыҙатлы. *Һыртлан ат. Һыртлан сыскан. Һыртлан тургай.*

**ҺЫРТЛАС** *и.* Бәләкәй тау һырты. *Ерәнсәй һыртлас буйлап бер көйө генә юрта.* З. Әхмәтов.

**ҺЫРТЛАТЫУ** *к.* **1.** Һырт буйлатыу. *Тау һыртлатып барыу.*

**2.** Кешенең һәр саҡ ыңғайына тороп, иркәләтеп, шаштырыу. *Баланы һыртлатыу.*

**ҺЫРТЛАУ** [1] *к.* **1.** Тау һыртын буйлау. *Саба торган юл һыртлап, ҡырлас буйлап килә.* Д. Юлтый.

**2.** *кусм.* Йомшаҡлыҡ, иркенлек һиҙеп, шашыу; буйлау. *Бер төрлө лә сара күрелмәне. Бына шуга ла ул [Диаров] һыртлаган, һәр әйтелгән һүҙ шулай коро һүҙҙә генә ҡаласагына нык ышынган.* Ә. Әлибаев.

**ҺЫРТЛАУ** [2] *и.* Тәпәшәк, һөҙәк һырт. *[Ҡотло ата] бөтәһен эйәртеп, һыртлау ягындагы урманга ҡарай алып китте.* Ғ. Ибраһимов.

**ҺЫРТЛЫҠ** *и.* **1.** Шлыяның һырттан үткән буй ҡайышы.

**2.** *диал.* Арҡалыҡ.

**ҺЫРТЫҠ** *и.* Өсөнсө быҙаулар һыйыр.

**ҺЫРЫҒЫУ** (һырыҡ*ғ*) *к.* **1.** Нык яҡын килеп терәлеү; һыйыныу. *Мөйөшкә һырыгыу.* ■ *Сәгиҙә эттән ҡурҡып, Тәнзилә әбейгә һырыкты.* М. Тажи.

**2.** Таяныс, ярҙам теләп яҡынлау. *Һыңар күҙле Әбләй ҙә шулар [байҙар] тирәһенә һырыккан.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** *кар.* **һырыу** [2].

**ҺЫРЫҒЫШЫУ** *к. урт. кар.* **һырығыу.** *Һырығышып ултырыу.*

**ҺЫРЫҠ** [1] *и.* Ҡаҡларға ит элә торған ҡолға.

**ҺЫРЫҠ** [2]: **һырыҡ һалыу** һырығыу. *Байымдың еткән ҡыҙы .. һаман да миңә һырыҡ һала ине.* Ғ. Минһажев.

**ҺЫРЫҠМА** *с. кар.* **һырғаҡ** [2]. *Һырыкма буран.*

**ҺЫРЫҠТЫРЫУ** *к.* **1.** Нык яҡын килтереү; терәлдереү. *Кешене мөйөшкә һырыҡтырыу.*

2. Таяныс, ярҙам биреп, яҡынлатыу.

**ҺЫРЫЛЫУ**[1] *к. төш. кар.* **һырыу**[1]. *Баланы үҙеңә һырыктырыу. Һырылган салбар.*

**ҺЫРЫЛЫУ**[2] *к. кар.* **һырығыу.** *Ямгырҙан өшөп колон инәһенә һырыла.* М. Тажи.

**ҺЫРЫЛЫШЫУ** *к. кар.* **һырығышыу.** *Һырылышып йөрөү.* ■ *Муллалар һырылышып өйгә атылдылар.* Т. Хәйбуллин.

**ҺЫРЫМА** *и. кар.* **һырма**[2].

**ҺЫРЫН** *и. кар.* **ҡорт**[1]. *Һырын һалыу.*

**ҺЫРЫНДЫ** *и.* Нимәгәлер һырытып, ел өйгән ҡар; көрт. *Тау-тау булып бейек һырындылар йорт-кураны баҫты, тултырҙы.* Д. Юлтый.

**ҺЫРЫНДЫЛАУ** *к.* Һырынды булып өйөлөү. *Тимер юл буйындагы такта кәртәләр эргәһенә кар һырындылаган.* А. Таһиров.

**ҺЫРЫНДЫРЫУ** *к.* Ныҡ яҡын килтереп, терәлдереү. *Мөйөшкә һырындырыу.*

**ҺЫРЫНЫУ** *к.* Ныҡ яҡын килеп терәлеү; һырығыу, һыйыныу. *Ҡоймага һырыныу. Һырынып ултырыу.* ■ *Тимер стенага һырына биреп, тәҙрәнән тышка караны.* Б. Бикбай. *Буләкбай ҙа куркыуынан әсәһенең куйынына һырынды.* Т. Хәйбуллин.

**ҺЫРЫТЫУ**[1] *к. йөкм. кар.* **һырыу**[1]. *Юрган һырытыу.*

**ҺЫРЫТЫУ**[2] *к.* Һырырға юл ҡуйыу, йәбештереү. *Дегәнәк һырытыу.*

**ҺЫРЫУ**[1] *к.* **1.** Эсенә йөн, мамыҡ һымаҡ нәмә һалып, үтә сәнсеп тегеү. *Салбар һырыу. Көпө һырыу.* ■ *Береһе юрган һырый, береһе сигә — эш өҫтөндә былар барыһы ла.* Т. Йәнәби.

2. Кирегә аша сәнсеп тегеү. *Кул менән ике-өс кат һырып, кыҙыл кулдәкте тектеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**ҺЫРЫУ**[2] *к.* **1.** Күп булып йәбешеү. *Йөн һырый. Кейемгә дегәнәк һырыган.* ■ *Дегәнәк аттарҙың ялына, койрогона һырый.* Ж. Кейекбаев. *Өҫ-башына кар һырыган бер кыҙ килеп инде.* Н. Мусин.

2. Күмәк булып уратыу. *Кешене һырып алыу.* ■ *Иптәштәр мине һырып алды. Бөтә хәлде һөйләп бирҙем.* Д. Юлтый. *Бал корттары айыуҙы һырып ала ла сагырга маташа* (Әкиәттән). **Себен кеүек һырыу** бик күмәк булып ныҡ һырыу. *Тракторҙы кешеләр себен кеүек һырып алган.* Һ. Дәүләтшина.

**ҺЫРЫШҠАҠ** *с. һөйл.* Кешегә һырышып барыусан. *Һырышкак кеше.*

**ҺЫРЫШЫУ** *к.* **1.** Ныҡ яҡын килеп терәлеү, ныҡ яҡынлау; һырыныу, һырығыу. *Ергә һырышыу.* ■ *Көн эҫе, күгәүен кубәйҙе. Малдар ҙа куберәк күләгәгә һырыша.* Р. Солтангәрәев. *Төндә кәрниз буйына һырышкан күгәрсендәр .. ерҙә йөрөй.* Ш. Янбаев.

2. Таяныс, ярҙам, йылы эҙләп яҡынлау; һыйыныу, һырығыу. *[Мулла:] үҙе каскы был кеше, ситтән килеп һырышкан.* «Ҡараһаҡал».

3. *кар.* **һырыу**[2].

● *Ямандан кас, якшыга һырыш.* Әйтем.

**ҺЫТҠЫ** *и.* Эренләп сыҡҡан сабыртҡы. *Һыткылы бит. Һыткы сыгыу.* ■ *Йәш сакта биткә, кукрәккә, аркага һыткы сыгыусан була.* В. Ғөмәров.

**ҺЫТҠЫЛАУ** *к.* Һытҡы сығыу, һытҡы менән ҡапланыу, һытҡылы булыу. *Бите һыткылап бөткән. Тән һыткылау.*

**ҺЫТЛЫҒЫУ** (һытлыҡ*ғ*) *к.* Һытылып, һығылып ағыу. *Һытлыгып сыгыу.*

**ҺЫТТЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **һытыу.**

**ҺЫТЫҠ** *с.* **1.** Сатнаған, ватыҡ (йомортҡа һ. б. ҡарата).

2. *күсм.* Асыулы, кейефһеҙ, йәмһеҙ, боҙоҡ (йөҙ, сырай тураһында). *Хәлимә апайҙың иһә һытык сырайын, ауыр һүҙен ишетмәҫһең. Уның өсөн олоһо ла, кесеһе лә бер — бөтәһенә лә ягымлы ул.* Ш. Янбаев. *Икәү-ара серләшеп ултырганда Шүлгәндең һытык йөҙөн күргәнгә һомай унан һагайган.* «Урал батыр». / *һөйл.* Тиҙ генә иларға әҙер торған. *Һытык кыҙыкай.*

**ҺЫТЫЛЫУ** *к.* **1.** Ҡыҫҡандан боҙолоп һығылып сығыу. *Һытылып агыу.* ■ *Һытылырҙай булып, тулышып бешкән нәфис бөрлөгән тәлгәше мөлдөрәп карап тора.* Ф. Иҫәнғолов.

2. *күсм.* Асыулы йәки кәйефһеҙ төҫ алыу, боҙолоу (йөҙгә, сырайға ҡарата). *Фәкиһә әбей үҙе лә кыҙын йәлләп йөҙө һытылып илай башланы.* Ж. Кейекбаев.

**ҺЫТЫУ** *к.* **1.** Ҡыҫып, һығып, эсендәге шыйыҡ өлөшөн сығарыу (йомортҡа, төрлө емеш һ. б. ҡарата). *Баланды һытыу. Йөҙөмдө һытыу. Үтте һытыу.* ■ *Ҡарт, таш тип, кош йоморткаһын усына һытып агыҙган* (Әкиәттән). / Баҫып, ҡыҫып эсендәге үлеген, эренен сығарыу. *Шешекте һытыу. Һыткыны һытыу.*

2. *күсм.* Асыулы йәки кәйефһеҙ, йәмһеҙ төҫ биреп, боҙоу (йөҙҙө, сырайҙы). *Теге кыҙ минән ерәнгән һымак, .. сырайын һытып, күҙенең агы менән карап куйҙы.* Т. Йәнәби.

◆ **Үтен һытыу** аралашыу, алыш-биреш итеү һ. б. мөнәсәбәттә кешегә ҡарата ныҡ ҡаты булыу. *Кәрәк нәмәһен үтеңде һытып алыр. Бурысыңды һуңлатһаң үтеңде һытыр.* ■ *[Биксән агай] .. яҙгы өҙөктә лә ике-өс сана бесән һатып ебәрә. Хакын инде кеше әйтмешләй, үтен һытып ала.* Р. Солтангәрәев.

**ҺЫУ** *и.* **1.** Химик составы кислород һәм водородтан торған йылға, күл, диңгеҙҙәр яһаған үтә күренмәле төҫһеҙ шыйыҡлыҡ. *Бер йотом һыу. Бер тамсы һыу. Диңгеҙ һыуы. Һыуга барыу. Һыу эсеү.* ■ *Көмөштәй саф, балдай татлы шишмә һыуы һаман элеккесә һыуһагандың һыуһынын кандырган, арыганга хәл индергән, сырхаҡага шифалы дауа булган.* З. Биишева. **Зәмзәм һыуы** *кар.* **зәмзәм. Ҡара һыу** 1) тик һыу ғына, бер ниндәй аҙыҡ фәлән ҡатнаштырылмаған. *Ҡара һыу эсеп һимереп булмай;* 2) ауыҙҙан аҡҡан һыу, шайыҡ, шеләгәй; 3) боҙ киткәндән һуң ташып аҡҡан көслө һыу. *Ҡара һыу вакыты.* **Ҡар һыуы** ҡар ирегәндән барлыҡҡа килгән һыу. *Ҡар һыуы тотоу.* ■ *Һикереп-һикереп агалыр кар һыуы.* Х. Ибраһимов. **Ҡаты һыу** төрлө минерал тоҙҙар ҡатыш, татырлы һыу. *Ҡаты һыуҙа һабын эрей.* / Ҡуйы нәмәнән һарҡып, айырылып сыҡҡан шыйыҡлыҡ. *Ҡорот һыуы. Эремсек һыуы.* ■ *Гөлйөҙөм әсәһенә барып ак балсык, бер күнәк эркет һыуы алып килеп, өйөнөң эсен акларга тотондо.* Һ. Дәүләтшина.

2. Үҫемлек, кеше организмы күҙәнәктәре һәм төрлө ағзаларында була торған шыйыҡса. *Аш-*

*ҡаҙанында насар һыу йыйылған. Ҡайын һыуы эсеү.* ■ *Өй эсенә тәмле аш, ит еҫе таралған. Минең ашағым килеп, ауыҙ һыуҙарым ағып китте.* Ғ. Ғүмәр.

**3.** Төрлө еләк-емеш һ. б. ҡайнатып йәки төнәтмә яһап алған һут. *Алма һыуы. Балан һыуы. Сейә һыуы.*

**4.** Шул төҫһөҙ шыйыҡлыҡтан торған йылға, күл, диңгеҙ. *Һыуҙы аша сығыу. Һыу кисеү.* ■ *Тар ғына, тоноҡ, ағын бер һыу буйында баҡсабыҙ.* Ш. Бабич. **Һыу инеү** һыуға төшөп, йөҙә-йөҙә йыуыныу.

**5.** Дым, еүешлек. *Һыу үткәрмәй торған кейем. // Һыу кейем. Һыу тупраҡ.*

**6.** *күсм. һөйл.* Яҙған, һөйләгән һүҙҙең мәғәнәһеҙ, кәрәкмәгән әһәмиәтһеҙ өлөшө. *Уларҙа [әҫәрҙәрҙә] һыу мөмкин тиклем аҙыраҡ булһын.* Ғ. Ғүмәр.

◆ **Аҫҡа** (*йәки* **кәмәгә**) **һыу инеү** берәр төрлө ауыр хәлгә ҡалыу. **Ауыҙ һыуы ҡороу** нимәлер тураһында ҙур ләззәт менән иҫ китеп һөйләү. *Күрше-күлән ауыҙ һыуы ҡороп: «Северҙә ат осһоҙ икән..» тип һөйләй.* Б. Бикбай. **Баҡа һыуын сығарыу** ҡолаҡты ҡул менән баҫып, алмаш-тилмәш бер аяҡта һикереп, һыу төшкәндә тонған ҡолаҡтың тоноғон бөтөрөү. **Таң һыуы** боронғо мәжүси йола буйынса, таң атыр алдынан һыу эйәһенә хәйер биреп һорап алған изге һыу (күҙ һ. б. ауырыуҙарҙы дауалау өсөн). **Тере һыу** *миф.* экиәттәрҙәге үлгән кешене кире терелтә торған изге һыу. **Туфан һыуы** дини ҡараш буйынса, заман ахырында бөтә донъяны баҫа торған һыу. *Туфан һыуы калкыу.* **Һабан һыуы һалышыу** *ҡар.* **һабан. Һары һыу** 1) яҙ көнө ирей башлаған мәлгә ҡарата; 2) тәндең сирле еренә йыйылған шыйыҡлыҡ. **Һыу атаһы** мәжүси йола буйынса, бар һыуҙың иң ҙур хужаһы. *Сөләймән, һыуҙың атаһы, бығаулы, ти* (Хикәйәттән). **Һыу башлатыу** (*йәки* **күрһәтеү**) боронғо йола буйынса, яңы төшкән киленде тәү башлап һыуға алып барыу (килен төшкәндең иртәгеһенә ҡыҙҙар еңгәне уртаға алып һыуға бара; яҡын ҡәйенһеңлеһе һыу алғанда еңгә кеше балдаҡ йә тәңкә ташлай; шунан ҡәйенһеңле яҡшы теләк теләп, көйәнтәне еңгәһенең уң яурыиына һала). *Хәҙер ҙә яңы төшкән килендәрҙе ошо һуҡмаҡтан атлаталар, йылғанан һыу башлаталар.* М. Дилмөхәмәтов. **Һыу буйлатыу** өйҙә генә тотмай, ситкә сығарып ебәреү. *Ата-әсәһе һыу буйлатҡас, ҡыҙ балалар ҙа күпте күрә.* **Һыуға баткандай юҡ булыу** эҙһеҙ-хәбәрһеҙ юғалыу. *Ғилмиязаның ата-әсәһе, туғандары унан да, бынан да эҙләп ҡараған, тирә-яҡҡа хәбәр һалған, ләкин ҡыҙ һыуға баткандай юк булған* (Хикәйәттән). **Һыуға** (*йәки* **һыу төбөнә**) **һалыу** бушҡа тотоноп, юҡ итеү. *Аҡсаны һыуға һалыу.* **Һыуҙан ҡоро сығыу** ғәйепле хәлдән яуапһыҙ, анһат ҡотолоу. **Һыу буйы** оҙон-оҙаҡ һөйләнгән (һүҙгә, хәбәргә ҡарата). *Бында әллә ниндәй һыу буйы һүҙҙәр һөйләп тороуҙың .. кәрәге лә юк.* И. Насыри. **Һыу кеүек белеү** бнк яҡшы белеү. *Ул бик күп белә .. Урыҫса ла һыу кеүек белә.* Я. Хамматов. **Һыу кеүек эсеү** бик күп һәм яҡшы уҡыу. *Ауыл мәктәбендә ике ҡыш уҡығандан һуң, мин «Эфтиәкте», «Мөхәмәдиәне» һыу кеүек эсә торғайным.* Р. Ниғмәти. **Һыу инәһе** яңы тыуған сабыйҙы беренсе мәртәбә һыу индергән ҡатын-ҡыҙ. **Һыу мейе** *ҡар.* **мейе. Һыу һаҡлағыс** *ҡар.* **һаҡлағыс** 2. **Һыу эйәһе** (*йәки* **инәһе**) мәжүси йола буйынса, һыуға хужа булып шул һыуҙы һаҡлап йәшәгән мифик зат. **Һыу эскеһеҙ** итеү ныҡ туҡмау, иҫтән яҙҙырғансы туҡмау. *Улар һунарсылар өсәүләп Тимербөгәрҙе һыу эскеһеҙ итеп туҡмаған* (Әкиәттән).

**ҺЫУАЛҒЫС** *и.* Һыу ала торған урын; һыуалыш. *Мин һыу алған таныш һыуалғыска шат йылмайып уҙҙы ҡыҙ бала.* Ә. Таһирова.

**ҺЫУАЛДЫРЫУ** *к.* Һауыуҙан туҡтатып, һөтөн ҡайтарыу. *Һыйырҙы һыуалдырыу.*

**ҺЫУАЛҠЫ** *с.* Һыуалған, һауҙырмаған. *Һыуалҡы һыйыр.*

**ҺЫУАЛТЫУ** *к.* Һөт биреүҙән, һауҙырыуҙан туҡтатыу. *Һыйырҙы һыуалтыу.*

**ҺЫУАЛЫУ** *к.* **1.** Һөт биреүҙән, һауҙырыуҙан туҡтау. *Һыйыр һыуалды.* ■ *Аҡназар иттән шыпа өҙөлдө. Ҡаран ҡына торған яңғыҙ һыйыры быҙауларға яҡынлап, һыуалып китте. Итәк тулы бала менән аҡһыҙ ҡалдылар.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Оҙаҡ ҡайнап, һурпаһы кәмәү (ашҡа ҡарата). *Аш һыуалған.*

**ҺЫУАЛЫШ** *и.* Һыу ала торған урын; һыуалғыс. *Картуф баҡсалары араһынан һыуалышҡа берләм һуҡмак һалынған.* Ш. Янбаев.

**ҺЫУАТ** *и. ҡар.* **һыуалыш.**

**ҺЫУАТЛАУ** *к. ҡар.* **һыулау** [1]. *Ҡыҙ йылҡыларҙың ҡайһы ерҙә һыуатлап йөрөгәндәрен әйтә.* «Аҡһаҡ ҡола».

**ҺЫУБАҪАР** *с.* Яҙғы ташҡын һыу баҫа торған (урынға ҡарата). *Һыубаҫар туғай. Һыубаҫар болон. Һыубаҫар урындар.* ■ *Ямғыр яуманы, игендәр тамырҙа ҡатып ҡалды. Ғәҙәттә ат инһә күренмәй торған һыубаҫар сабынлыҡтар юкка сыҡты.* З. Биишева.

**ҺЫУҒАН** *и. ҡар.* **һуған.**

**ҺЫУҠОЯР** *и.* (*баш хәреф менән*) *астр.* Зодиактың береһе (Ылаҡ менән Балыҡ йондоҙлоҡтары уртаһында урынлашҡан).

**ҺЫУЛАЙ** *р.* Һыу көйө, еүеш көйө. *Һыулай өйөлгән бесән.*

**ҺЫУЛАНДЫРЫУ** *к.* Һыулыға, еүешкә әйләндереү; еүешләү; Һыулы итеү.

**ҺЫУЛАНЫУ** *к.* Һыуға мансылыу, һыу булыу; еүешләнеү. *Ямғырға һыуланыу.* ■ *Күлдәктәрем ҡоро, салбарым ғына һыуланған.* Д. Юлтый.

**ҺЫУЛАУ** [1] *к.* **1.** Һыуға мансыу, һыу итеү; еүешләү. *Кейемде һыулау.* ■ *Һипте апрель күҙ йәшенең өҫтөнә ямғырҙарын, һыуланы ҡырҙы, аяҡ аҫтын.* Ш. Бабич.

**2.** Һыуға болғатыу, һыулы итеү. *Сыуаҡай әбей уға [Иштуғанға] һалҡын шишмә һыуы менән ҙур бер туҫтаҡ айран һыулап бирҙе.* З. Биишева.

**3.** Бер һыу буйында йәшәп, шуның һыуын эсеү. *Ташбатҡан ауылын һуғарып, ҙур ғына бер йылға ята. Уны Үҙәште тиҙәр. Ауыл шул йылғаны һыулай.* Ж. Кейекбаев.

**ҺЫУЛАУ** [2] *и.* **1.** Һыу буйының көтөү төшөп ята торған урыны. *Көн эҫеп, һыйырҙар безләй башлағас, беҙ көтөүҙе һыулауға төшөрҙөк.* С. Агиш.

**2.** Һыу ала торған урын; һыуалыш. *Таштуғайкай һинең һыулауыңдан ташкайҙарға баҫып та һыу алдым* (Халыҡ йырынан).

**3.** Халыҡтың эсеп йәшәгән һыуы. *[Нәркәс:] Шүлгән тигән ҙур күлең һыулау булды йәшемдән.* «Аҡбуҙат». *Беҙҙең ауыл Урал итәгендә, Нөгөш һыуы уның һыулауы* (Халыҡ йырынан).

**ҺЫУЛЫ** *с.* **1.** Һыуы булған, һыуы бар. *Ерле ерен маҡтайҙыр, һыулы һыуын маҡтайҙыр.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». / Һыу ҡойолған йәки һыу менән тулы. *Һыулы күнәк.* ■ *Беҙ тағы ла һыулы канауҙарға теҙелеп яттыҡ.* Д. Юлтый.

**2.** Һыуланған; еүеш, һыу. *Һыулы тупраҡ. Һыулы бесән.*

**ҺЫУЛЫҠ** *и.* **1.** Ҡыйыҡтың түбәнге ситенә эс яҡтан һалынған буй ағас. *Һыулыҡ ағасы. Һыулыҡ буйы.* ■ *Зәһит һыулыҡтан айырылып, бер яҡҡа ығышкан трансаларҙы ҡыйыҡҡа яңынан түшәне.* Я. Хамматов.

**2.** Һыу аҡһын өсөн ҡыйыҡ ситенә махсус ҡуйылған буй таҡта.

**3.** Самауырҙың һыу ҡоя торған урыны. *Бабай самауырҙың утлығына һыу, һыулығына күҙ һалып ултырта* (Әкиәттән).

**ҺЫУЛЫУҠАУ** *к.* Ҡыйыҡ ситенә һыулыҡ ҡуйыу.

**ҺЫУМӘҘӘТ** *кар.* **һеүмәҙәт.**

**ҺЫУҺАҠ** *и. һөйл.* Һыу йыйып һаҡлау өсөн быуылған урын; быуа, һыуһаҡлағыс.

**ҺЫУҺАҠЛАҒЫС** *и.* Һыу йыйып һаҡлау өсөн быуылған урын; быуа. *Һыуһаҡлағыс төҙөү. Нөгөш һыуһаҡлағысы.*

**ҺЫУҺАР**[1] *и.* **1.** Оҙонораҡ тороҡло, ялбыр ҡойроҡло күрән төҫтәге ҡиммәтле тиреле ҙур булмаған йыртҡыс йәнлек. *Һыуһар тотоу.* ■ *Һыуһар бесәй һымаҡ .. тик нәҙегерәк тә бер аҙ оҙонораҡ .. һыуһар айыу һымаҡ бал ярата.* Ә. Гәрәев. *Һыу буйкайҙарында һыуһар күп, ҡойроҡтары уның йофар күк* (Халыҡ йырынан).

**2.** *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Һыуһар яға.*

**3. һыуһарҙар** *зоол.* Бурһыҡ, ҡама һ. б. кеүек һөтимәр йыртҡыстар ғаиләһе.

**ҺЫУҺАР**[2] *и. диал.* Энәлек, дунала.

**ҺЫУҺАТЫУ** *к.* **1.** Һыу эске килтереү. *Сәй эсермәй кешене һыуһатыу.*

**2.** *эйһ. ф. кар.* **һыуһау** 1. *Һыу килтерҙеләр. Мин дә эстем. Бик ваҡытлы ине — һыуһатҡан.* Х. Кәрим.

**ҺЫУҺАУ** *к.* **1.** Һыу эске килеү. *Һыуһап китеү.* ■ *[Әбей:] Ҡыҙым, мунсанан һуң һыуһаным, бер сәй эсер ҙә инде, ҡайтһаң ҡайтырһың* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Нимәгәлер ныҡ зарығыу, нимәгәлер көслө ҡүңел талабы һиҙеп, ныҡ ынтылыу. *Белемгә һыуһау. Иреккә һыуһау. Мөхәббәткә һыуһау.* ■ *Оҙаҡ маршруттан һуң һыбайлылар дошмандан үс алыуға һыуһағайны.* И. Кинйәбулатов.

**ҺЫУ-ҺҮЛ** *и. йыйн.* **1.** Яҙғы ташҡын һыу. *Һыу-һүл ваҡыты.* ■ *Байтаҡ бала йөрөп уҡығанлыҡтан, яҙғы каникулды һыу-һүл ваҡытында яһайҙар.* Н. Мусин.

**2.** Йыйылып йәки ағып ятҡан һәр төрлө һыу, төрлө йылға һәм күл. *[Нәҙерша:] Дошман килер юлдарҙа һыу-һүл аша күперҙең берен ҡуймай боҙоғоҙ.* «Мәргән менән Маян». *Был ике быҙау һис һыу-һүлгә эләкмәй .. Уралға барып сыҡҡан.* «Ҡуңыр буға».

**ҺЫУҺЫҘ** *с.* **1.** Һыуы юҡ, һыуға мохтаж. *Һыуһыҙ сүл. // Һыуһыҙ интегеү.* ■ *Һыуһыҙ ҡалған башҡортҡа һыуын бирәм, тигән ул [Пугачев].* Салауат Юлаев.

**2.** Һыу ҡушылмаған. *Һыуһыҙ матдә. Һыуһыҙ спирт. // Һыуһыҙ бешереү.*

**ҺЫУҺЫҘЛАНДЫРЫУ** *к.* Һыуһыҙға әйләндереү, һыуһыҙ итеү.

**ҺЫУҺЫҘЛАНЫУ** *к.* Нимәнеңдер составында һыуы кәмеү, бөтөү, һыуһыҙға әйләнеү.

**ҺЫУҺЫҘЛЫҠ** *и.* Һыуға ҡытлыҡ, һыу етешмәгән хәл. *Һыуһыҙлыҡтан яфа сигеү. Һыуһыҙлыҡ арҡаһында үҫемлектәр кәмеү.*

**ҺЫУҺЫЛ** *с.* **1.** Һыу һеңгән; һыулы. *Ә хәҙер тирәк ниндәй! Һыуһыл тамырҙарын ер ҡуйынына һуҙған.* Т. Килмөхәмәтов.

**2.** Һыуланып, һылашып торған. *Һыуһыл балсыҡ. Һыуһыл картуф.*

**ҺЫУҺЫЛЫУ** *и. (баш хәреф менән)* **1.** Мифик һыу ҡыҙы. *Һыуһылыу Һәүбәнде Шүлгән күлгә алып төшә.* «Аҡбуҙат».

**2.** Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ҺЫУҺЫН**[1] *и.* **1.** Ныҡ һыуһап, эске килеү теләге. *Һыуһынға айран эсеү. Һыуһынды ҡандырыу.* ■ *Алыҫ юлдан сарсап килгәнһеңдер, ҡымыҙ эсеп ебәр һыуһынға.* Б. Вәлит.

**2.** Һыуһағанда эсеү өсөн әҙерләнгән эсемлек. *Һыуһын әҙерләү. Һыуһын эсереү.* ■ *[Ҡыразбикә:] Ҡарагол, һин арығанһыңдыр, инеп һыуһын эс.* Д. Юлтый. *[Нәркәс — Һәүбәнгә:] Атам һыуһын биргәндә һул ҡул менән алырһың.* «Аҡбуҙат».

**ҺЫУҺЫН**[2] *и.* **1.** Бесән, иген һ. б. эштәрҙә бер арығанса эшләп алған ваҡыт араһы. *Иртәнге һыуһын. Бер һыуһын эшләп алыу.* ■ *Эш ырай .. Башҡа көндәрҙә һыуһынына ун йөктән арттырып булмай торғайны, бөгөн ун бишкә еткерҙек.* Н. Мусин.

**2.** Билдәле бер ваҡыт эшләгәс, туҡтап ял иткән ваҡыт. *Көндөҙгө һыуһынға туҡтағас, һыуға бешерелгән тары өйрәһе, .. тары бутҡаһы, баяғы ҡара икмәк ашалды.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҺЫУҺЫРАУ** *к. кар.* **һыуһыҙланыу.**

**ҺЫУЫҒАЙЫУ** *к. кар.* **һыуыу.**

**ҺЫУЫҠ** I *с.* Ғәҙәттәгенән ныҡ түбән температуралы; *киреһе* йылы. *Һыуыҡ ҡыш. Һыуыҡ ел. Һыуыҡ көн. Һыуыҡ һыу. Һыуыҡ булыу.* ■ *Йылы өйҙән һыуыҡ таң алдында юлға сыҡҡанға .. бөтә тән һыуыҡһып ҡалған.* Ғ. Дәүләтшин.

II *и.* Ғәҙәттәгенән ныҡ түбән температуралы һауа. *Көҙгө һыуыҡ. Ҡышҡы һыуыҡ. Саскау һыуыҡ. Сатнама һыуыҡ.* ■ *Әсе елдәр тауышы үҙәк өҙә, һыуыҡтарҙа туңғас мин, бала.* Ғ. Амантай. **Ҡара һыуыҡ** ҡар яумаҫ элек булған көҙгө һыуыҡ. **Ҡоралай һыуығы** май айының тәүге яртыһында була торған һыуыҡ. **Сыйырсыҡ һыуығы** сыйырсыҡ килгән ваҡытта була торған яҙғы һыуыҡ. *Тары сәсһәң, сыйырсыҡ һыуығынан һуң сәс.* Һынамыш.

♦ **Һыуыҡ алдырыу** (*йәки* **тейҙереү**) һыуыҡ тәьҫиренә бирешеп ауырыу. **Һыуыҡ тейеү** һалҡын тәьҫирендә ауырыу.

● *Ҡара һыуыҡ ҡарҙан яман.* Әйтем.

**ҺЫУЫҠЛЫҠ** *и.* Һыуыҡ температураның кимәле. *Декабрҙә һыуыҡлыҡ 44—48 градусҡа етә.*

**ҺЫУЫҠҺЫУ** *ҡ.* Һыуыҡ тәьҫиренә бирелеү; өшөү. *Йылы өйҙән һыуыҡ таң алдында юлға сыҡҡанға .. бөтә тән һыуыҡһып ҡалған.* Ғ. Дәүләтшин.

**ҺЫУЫН** *и.* Ҡыпсаҡ ырыуына ингән бер башҡорт араһы.

**ҺЫУЫНДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Эҫеләгән хәлдән һыуынған хәлгә килтереү; һыуыҡ алдырыу. *Атты һыуындырыу.*

**2.** *күсм.* Ҡыҙышҡан хәлдән ҡайтарыу; һүрелдереү.

**3.** *күсм.* Күңелен ҡайтарыу. *Кешене үҙеңдән һыуындырыу.*

**ҺЫУЫНЫУ** *ҡ.* **1.** Эҫеләгән тәндө һыуытыу, һыуыҡ алыу. *Тышҡа сығып, һыуынып инеү.* ■ *Турысай ҙа һыуынып өлгөргән, ҡамытын һыпырып уны тышаны ла, тула сәкмәнен йәйеп ебәреп, [Мөлөк] тамаҡ алырға ултырҙы.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *күсм.* Ярһыған, ҡыҙған хәлдән ҡайтыу; тынысланыу. *Ҡарға сумып барып төшкәс кенә, егет аҙыраҡ һыуына бирҙе.* Б. Бикбай. / Ҡыҙыу эш-хәрәкәттән ҡайтыу; һүрелеү. *Ул арала баҙар һыуына, тарала башлай* (Әкиәттән).

**3.** *күсм.* Күңел ҡайтыу; һүрелеү. *Бер-береңдән һыуыныу. Кешенән һыуыныу. Эштән һыуыныу.* ■ *[Хисмәтулла — Гөльямалға:] Интектереүемә ҡарамаҫтан, һаман минән һыуынмайһың, һаман өҙөлөп яратаһың, һаман кәҙер итәһең.* Я. Хамматов.

**4.** *диал.* Һыуыу.

**ҺЫУЫНЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **һыуыныу** 1, 3. *Һыуынышып бөтөү.*

**ҺЫУЫР** *и.* Тейен һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, өң ҡаҙып йәшәй, ҡыш йоҡлай торған кимереүсе йәнлек.

● *Күп һыуыр өң ҡаҙмаҫ, өң ҡаҙһа ла, киң ҡаҙмаҫ.* Әйтем.

**ҺЫУЫТҠЫС** *и.* Тиҙ боҙола торған ашамлыҡтарҙы һаҡлау өсөн яһалма рәүештә түбән температура булдырылған махсус ҡоролма. *Итте һыуытҡысҡа һалыу.*

**ҺЫУЫТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **һыуытыу** 1. *Һыуытылған сәй.*

**ҺЫУЫТЫУ** *ҡ.* **1.** Һыуыҡ хәлгә килтереү, йылылығын бөтөрөү. *Эҫер сәйен һыуытып, бар донъяһын онотоп, йыйылып ултырыр ҡарттар бар* (Ҡобайырҙан). **Тир һыуытыу** тирләгән тәнде еләтеү; һыуыныу. *Бай йорт уртаһында ҡулдәгеләр ҡулдагенең күкрәк тураһынан тотоп, еләтеп, тир һыуыта ине.* И. Көҫәпҡол.

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **һыуыу.** *Быйыл иртә һыуыта.*

◆ **Ат һыуытыу** *ҡар.* **ат**[1]. **Нигеҙ һыуытыу** элекке, тыуған йортто ташлау, унан китеү. **Тауыҡ һыуытыу** баҫырға йөрөгән тауыҡты һыуыҡ һыуға тығып баҫырға булған теләген бөтөрөү. *Юлай Әнрәйҙе күперҙән аҫҡа һөйрәп төшөрҙө лә, баҫып ятҡан тауыҡты һыуытҡан кеүек, бер ике тапҡыр һыуға батырып алды.* И. Ғиззәтуллин.

**ҺЫУЫУ** *ҡ.* Йылылыҡ кимәле ныҡ төшөү; эҫелеге, йылылығы кәмеү; һыуыҡҡа әйләнеү, һыуыҡ булыу. *Аш һыуый. Көн һыуый. Өй һыуый.*

● *Бешкәнсе түҙгән, һыуынғанса үлгән.* Мәҡәл.

**ҺЫЯ** *и. диал.* Шыя.

**ҺӘ: һә тигәнсә** бик тиҙ арала. *Һә тигәнсә барып етеү. Һә тигәнсә эшләп ташлау.* ■ *Һунарсы бүрәнәне ала ла теҙә, ала ла теҙә, һә тигәнсә йортто һалып бөтә* (Әкиәттән).

**ҺӘБА** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Бушҡа, файҙаһыҙға. *Нисә айҙар, нисә көнгө хыялдар, һәба улыр тамам өс көндә анлар* (Мөнәжәттән).

**ҺӘБЕҮ** [*һәпә*] *ҡ. диал. ҡар.* **һабыу**[1] 2.

**ҺӘБЕШЕҮ** *ҡ. диал.* Эләгеү, йәбешеү. *Арбаға һәбешеү. Һәбешеп ултырыу. Һәбешеп йөрөү.*

**ҺӘГӘҮ** *и.* **1.** Бүрәнә тәгәрләтә, кәмә этә торған оҙон таяҡ.

**2.** *диал.* Һәргәү.

**ҺӘҒӘТ: һәғәт тигәнсә** бик тиҙ арала; һә тигәнсә. *Һәғәт тигәнсә барып етеү. Һәғәт тигәнсә эшләп ташлау.*

**ҺӘҒӘТТӘ** *р.* Бик тиҙ арала; һә тигәнсә. *Һәғәттә килеп еттеләр.*

**ҺӘДЕРӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Бушҡа, юҡҡа.

□ **һәдерә булыу** юҡҡа сығыу. *Был фетнәләрҙә ни кәҙәр малдар әрәм булды, ни кәҙәр гонаһһыҙ ҡандар һәдерә булды.* М. Һаҙыев.

**ҺӘҘИӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк. кит. ҡар.* **бүләк**[1]. *Һәҙиә биреү. Һәҙиә итеү.*

**2.** *(баш хәреф менән)* Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ҺӘҘӘП** *и. ҡар.* **һиҙән.** *Һәҙәп тағыу. Һәҙәпте эләктереү.*

**ҺӘЖҮ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ысынбарлыҡтағы етешһеҙлектәрҙән әсе көлөп, уларҙы фашлап яҙылған әҫәр; сатира. *Кеше үҙ тормошонда һәр ваҡыт етдиәт менән генә лә йәшәй алмай. Шаярыу, уйын һүҙ, һәжүләрҙе лә теләй.* Т. Йәнәби.

**ҺӘЖҮИ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Әсе көлкөлө; сатирик. *Ул үҙ шиғырҙары, мәҫәлдәре, һәжүи фельетондары менән эшеләр, крәҫтиәндәр, хеҙмәткәрҙәр менән иркен һөйләшә ала.* М. Тажи.

**ҺӘЗАР**[1] [*фарс.*] *һ. иҫк. кит.* Мең. *Мин был ҡарыйҙың зирәклегенә һәзар афариндар уҡыным.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ҺӘЗАР**[2] [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Һандуғас. *Ҡарға, ҡоҙғон ташлаһалар йырҡыслыҡты, шатлыҡ менән һайрар ине һәзар дастан.* С. Яҡшығолов.

**ҺӘЗЕЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Шаян һүҙ. *Күп күрҙек кәбер ҡаҙған егеттәрҙе, араһында һәзел, уйын тулып ятыр.* Аҡмулла.

**ҺӘЙ** *ымл.* **1.** Һоҡланған йәки үкенгән кеүек хис-тойғоно белдереп әйтелгән һүҙ. *Һәй гүмерҙәр! Һәй, ҡыҙыҡ, күргәс мине тайҙар, колондар өркәләр.* Ш. Бабич.

**2.** Иҫ китмәгән, ғәмһеҙ ҡараған, анһатҡа һанаған кеүек мөнәсәбәтте белдереп әйтелгән һүҙ. *[Рәхим:] һәй, әсәй, бер мәшәҡәте лә юҡ уның.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** Йылҡы малын ҡыуалағанда әйтелгән һүҙ.

**ҺӘЙБӘТ** [*ғәр.*] *с.* Юғары сифатлы; яҡшы. *Һәйбәт кеше. Һәйбәт йорт. Һәйбәт китап. // Һәйбәт йөрөү. Һәйбәт йәшәү. Һәйбәт эшләү.* ■ *Үҙ мәлендә ямғырҙары ла булғас, арыш та бик һәйбәт булып ҡурпылап сыҡҡан.* Ғ. Дәүләтшин. *Аҡназар ҡыуанып бөтә алмай: балалары ла, бисәһе лә табыла, улар бик һәйбәт тора башлайҙар* (Әкиәттән). / Яҡшы булыу арҡаһында яуланған абруй, дәрәжә. *Аһ, ни хәтле шөкәтең ҙур, күккә ашҡан һәйбәтең.* Х. Ғәбитов.

**ҺӘЙБӘТЛӘНЕҮ** *к.* Һәйбәткә әйләнеү, һәйбәт булыу. *Һәйбәтләнеп китеү.*

**ҺӘЙБӘТЛӘҮ** *к.* Һәйбәт итеү. *Һәйбәтләп ашау. Һәйбәтләп йоҡлау. Һәйбәтләп эшләү.* ■ *Сәлмән ерҙе һөрөп, бик һәйбәтләп йомшартып, картуф ултыртҡан* (Әкиәттән).

**ҺӘЙҘҮК** [*рус.* гайдук 〈 *вен.*] *и. тар.* 15—19 быуаттарҙа көньяҡ славян халыҡтарының төрөк хакимлегенә ҡаршы көрәшендә ҡатнашыусы.

**ҺӘЙКЕЛДӘҮ** *к.* Һәй-һәй тип мал ҡыуыу.

**ҺӘЙКӘ** *и.* Тәңкәле муйынсаҡ.

**ҺӘЙКӘЛ** [*ғәр.*] *и.* Ҙур тарихи ваҡиға йәки танылҡлы кешегә бағышлап ҡуйылған архитектура йәки скульптур ҡоролма. *Мәрмәр һәйкәл. Ленин һәйкәле. Салауат һәйкәле. Һәйкәл ҡуйыу.* ■ *Һәйкәлдәрҙе һәр саҡ сәскә биҙәй, сәскәләргә төйәк — һәйкәлдәр.* М. Уразаев.

**ҺӘЙЛҮК: ай һәйлүк** *ымл.* оҙон йырҙарҙы йырлағанда тойғоно көсәйтеү, йыр күтәреү өсөн өҫтәлә. *Беҙ йырламай хәлдәр ауыр булғас, ай һәйлүк, ғүмеребеҙ зая бит күрәһең.* М. Буранғолов.

**ҺӘЙЛӘҮ** *к.* Һәй-һәй тип мал ҡыуыу.

**ҺӘЙЬӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ойошма. *Ғилми һәйьәт. Һәйьәт башлығы.* ■ *Һуҙғә соцлоҡта Нурый бөтәһенән дә уҙҙырҙы. Ул ҡаланың атаҡлы мәҙрәсәһенең һәйьәт мөдире Әгләм мулла булып һөйләшә.* А. Таһиров.

**ҺӘЙЬӘТЛӘНЕҮ** *к. иҫк. кит.* Бурыс алыу.

**ҺӘЙӘЖАН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Бола. *Ырымбурҙа тормош рәте бөтә, һәйәжанлы көндәр башлана.* З. Шәрҡи.

**ҺӘЛ** *р. диал.* Саҡ-саҡ, әҙ генә. *Ул атаһынан һәл ҡайтыш.*

**ҺӘЛБЕР** *с. кар.* **һалбыр.** *Һәлбер ҡойроҡ.*

**ҺӘЛИЛӘҮ** *ымл.* Таҡмаҡ әйткәндә ритмды боҙмаҫ өсөн һәм тойғо өҫтәп ебәреү өсөн таҡмаҡҡа өҫтәлә торған һүҙ. *Ул [Дилә] силәккә ҡулдары менән сыңҡылдатып һуҡҡылап, бейеү таҡмағы әйтә башланы: һәлиләү, һәлиләү.* Һ. Дәүләтшина. *Әлиләү генәйем, һәлиләү генәйем Әсмәбикә тыпырҙатып баҫып килә генәйем* (Халыҡ йырынан).

**ҺӘЛКӘҮ** *с.* Эшкә, хәрәкәткә дәртһеҙ; ығыш, яй, һүлпән. // *Һәлкәү атлау. Һәлкәү йөрөү.* ■ *Поезд һәлкәү генә артыҡ ҡабаланмай ғына тиҙлеген арттырҙы.* Й. Мостафин.

**ҺӘЛКӘҮЛӘНЕҮ** *к.* Һәлкәүгә әйләнеү, һәлкәү булыу. *Һәлкәүләнеп китеү. Һәлкәүләнеп йөрөү.*

**ҺӘЛКӘҮҺЕҮ** *к.* Ялҡыу, йыбаныу; һәлкәүләнеү. *Һәлкәүһеп китеү.*

**ҺӘЛМӘГӘЙЕҮ** (һәлмәк*ғ*) *к.* Һәлмәккә әйләнеү, һәлмәк булыу. *Ғәйникамал әбей һәлмәгәйгән күҙ ҡабаҡтарын япты.* Ш. Янбаев.

**ҺӘЛМӘЙЕҮ** *к. диал.* Шаҡ ҡатыу. *Һәлмәйеп ҡарап тороу.*

**ҺӘЛМӘК** *с. кар.* **һалмаҡ.** 1. *Һәлмәк нәмә. Һәлмәк булыу.* ■ *Оло салғы һәлмәк. Уның менән бер һелтәһәң, үләнде ғыжлатып киҫә лә һала.* Р. Низамов. *Күк бейә оло юл менән һәлмәк кенә юртып бара ине.* Б. Ишемғол.

**ҺӘЛМӘКЛӘНЕҮ** *к. кар.* **һалмаҡланыу.** *Һәлмәкләнеп орсоҡ тулып килә.* С. Ҡудаш.

**ҺӘЛМӘКЛӘТЕҮ** *к. кар.* **һалмаҡлатыу.** *Тышта елдәр. Ҡуныц аҡ күбәләк, һәлмәкләтә ағас баштарын.* Ғ. Ғүмәр.

**ҺӘЛМӘКЛӘҮ** *к. кар.* **һалмаҡлау** 2. *Хаммат юл тоҡсайын күтәреп, әҙ генә һәлмәкләп тора биргәс, кире иҙәнгә ултыртты.* З. Биишева.

**ҺӘЛМӘҮҺЕРӘҮ** *к. кар.* **һәлмәүһеү.**

**ҺӘЛМӘҮҺЕҮ** *к.* Тән ауырайып, ҡуҙғалырға ҡыйынһыныу. *Һәлмәүһеп ултырыу.*

**ҺӘЛПЕ** *с. кар.* **һалпы.**

**ҺӘЛПЕЛДӘҮ** *к. кар.* **һалпылдау.**

**ҺӘЛПЕРӘЙЕҮ** *к. диал.* Һалбырау.

**ҺӘЛПҮШ** *с.* **1.** Бушаҡ ҡуллы, оҫолһоҙ. *Һәлпүш кеше.*

**2.** Бушаҡ. *Һәлпүш йөк.* // *Атты һәлпүш егеү.*

**ҺӘЛП-ҺӨЛП** *окш. кар.* **һалп-һолп.** *Ылаусылар сана табаны шығырҙауын тыңлап, көндәр буйы һәлп-һөлп атлай ҙа атлай.* Н. Мусин.

**ҺӘЛПӘЙЕҮ** *к. кар.* **һалпайыу.**

**ҺӘЛПӘК** *и. кар.* **һәрпәк.**

**ҺӘЛПӘНДӘҮ** *к.* **1.** *кар.* **һалпанлау.** *Һәлпәндәп йөрөү.* ■ *Атлайым микән, юҡ микән тип һәлпәндәп барған Бурылға был һыҙғырыу етә ҡалды.* Ш. Шәһәр.

**2.** *күсм.* Төрлө мәшәҡәт, ваҡ-төйәк эш менән күп йөрөү. *[Ынйыбикә:] Өйҙә кешем юҡ.. Ни ҡыҙың, ни киленең булмағас, бөтәнәһенә лә үҙең һәлпәндәргә тура килә.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҺӘЛПӘН-ҺӨЛПӘН** *р.* Кәүҙәне уңға-һулға ташлап, ауыр итеп (атлау). *Һәлпән-һөлпән итеү.* ■ *[Иҙеүкәй:] Ҡатындай булып ҡайтмамын һәлпән-һөлпән йөрөрмөн.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

**ҺӘЛПӘР** *и.* Иҙән ҡыра торған ҙур яҫы бысаҡ; касар. *Һәлпәр менән иҙән ҡырыу.*

**ҺӘЛӘБӘЙ** *и. диал.* Көлтә арбаһы.

**ҺӘЛӘК**[1] [*ғәр.*]: **һәләк булыу** 1) юҡҡа сығыу; бөтөү; үлеү. *Бик күп кеше һәләк булды, бик күп ҡан ҡойолдо, ти, был һуғышта* (Әкиәттән); 2) бик ауыр, сараһыҙ хәлгә ҡалыу; харап булыу. *Ни эшләһен, Йәмилә һылыу кейенә инде, башым һәләк булды, тип көйөнә инде.* «Бабсаҡ менән Күсәк». **һәләк итеү** 1) юҡҡа сығарыу; бөтөрөү. *Игенде һәләк итеү. Кешене һәләк итеү.* ■ *Ул [диңгеҙ] беҙҙең бөтәбеҙҙе лә һәләк итергә йыйына.* З. Биишева; 2) бик ауыр, сараһыҙ хәлгә ҡалдырыу; харап итеү. *Башты һәләк итеү.*

**ҺӘЛӘК**[2] [*ғәр.*] *р.*, **һәләк тигәнсә** Бик (көсәйтеү мәғәнәһе бирә). *Һәләк ауыр. Һәләк ҙур. Һәләк уңған. Һәләк тигәнсә оҫта. Һәләк тигәнсә ҡыуаныу.* ■ *Иршат һәләк һөйөндө.* В. Нафиков. *Ҡулыма алған тәүге ҡорал һәләк осло һәнәк булды.* Р. Ниғмәти.

**ҺӘЛӘКӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Бөтә тереклек, тормошто юҡ итә, бөтөрә торған хәл, ҡыйралыш. *Һәләкәттән һаҡлау.* ■ *Ер йөҙөнөң күп урындарында ваҡыт-ваҡыт көслө тетрәүҙәр булып тора. Ул ҡалаларға, ауылдарға ҙур һәләкәт һәм емерелеүҙәр килтерә.* Д. Бураҡаев.

**2.** Ҙур ҡырылыш. *Аслыҡ һәләкәте. Һуғыш һәләкәте.* ■ *1921 йылғы аслыҡ һәләкәтенән дә беҙҙе Мағаш тауы ҡотҡарҙы. Йүкә, йыла ҡайырын киптереп он итеп күмәс бешереп ашаныҡ.* Ш. Насыров. *Беҙ һуғыштың бөтә дәһшәтен, бөтә һәләкәтен күҙ алдына килтерә алабыҙ.* Д. Юлтый.

**3.** Фажиғәле ваҡытһыҙ үлем. *Һәләкәткә осрау. Һәләкәткә дусар булыу.* ■ *Суд ваҡытында ул [Сакай] бүреләй стенаға һырлыҡтырылғас,*

*Фәгиләнең һәләкәте өсөн дә үҙе гәйепле булыуын таныны.* Б. Бикбай. / Үтә ныҡ ауыр хәл. *Һәләкәткә барыу.* ■ *[Хажиғәли:] Ил карттары, ағай-энеләр .. атайым хаҡына булһа ла мине ошо ҡот осҡос һәләкәт упҡынынан тартып алырға тейешһегеҙ.* М. Тажи. *[Юламан ҡарт] Бураншаның, уның артынса бөтә ғаиләһенең һәләкәтен тағы бер ҡат өр-яңынан кисереп сыҡты.* З. Биишева.

● *Берлектә — бәрәкәт, тарҡаулыҡта — һәләкәт.* Мәҡәл.

**ҺӘЛӘКӘТЛЕ** *с.* Юҡҡа сығарғыс, ҡыйралышҡа килтергән. *Һәләкәтле һуғыш.* / Һәләкәткә килтерә торған. *Һәләкәтле яҙмыш.* ■ *Аҙашкан кешенең юлы һәләкәтле бейек ярға килеп туктalғас, кайҙа барырға белмәй аптырап торғанда: — Алда юл юк, тигән.* Д. Юлтый.

**ҺӘЛӘТ**[1] [*ғәр.*] *и.* Ниҙер эшләү, кешегә тыуыштан бирелгән нимәнелер эшләй, булдыра алыу, ижад итеү, булдырыу ҡеүәһе, сифаты. *Бейеү һәләте. Яҙыу һәләте. Һәләтте үҫтереү.* ■ *Импровизаторлыҡ һәләте, күрәһең, Рәхимә еңгәгә әсәһенән бирелгәндер. Ул беҙгә лә бик күп һәм әһәмиәтле әҫәрҙәр яҙҙырҙы.* К. Мәргән. / Ниндәйҙер эш-хәрәкәтте үтәү мөмкинлеге. *Орлоктоң шытыу һәләте. Илдең хәрби һәләте.*

**ҺӘЛӘТ**[2] *р.* Бик тиҙ; йәһәт. *Һәләт булыу. Һәләт кенә ашау.* ■ *[Батырҙың] .. бөтә тәндәре ауырта, тораһы килмәй ине. Ләкин чекист алдында һүҙ биреүе иҫенә төшөп торҙо, һәләт кенә кейенде һәм вахтаға сыкты.* Н. Иҙелбай. *[Ҡәләнфер, Нәҙкәй:] Йәгеҙ, һәләт булығыҙ, туланы тиҙерәк ебәрәйек.* «Ынйыҡай менән Юлдыҡай».

**ҺӘЛӘТЛЕ** *с.* Һәләткә[1] эйә. *Һәләтле бала. Һәләтле шағир. Һәләтле булыу.* ■ *Беҙҙең Мәрйәм йәштән музыкаға һәләтле булды.* Д. Юлтый.

**ҺӘЛӘТЛЕК** *и.* Кешенең ниҙер эшләү, ижад итеү, булдырыу ҡеүәһе, сифаты; һәләт. *Ижади һәләтлек. Эшкә һәләтлек. Мәсьәлә эшләү укыусыларҙың фекерләү һәләтлеген үҫтерә.* ■ *Салауат ат өҫтөндә уйында ерҙә ятҡан һумлыкты сабып килеп алып ул һәләтлектә уҙышкан.* М. Буранғолов.

**ҺӘЛӘТЛЕЛЕК** *и. кар.* **һәләтлек.** *Бөтә һәләтлелекте биреү. Илдең оборона һәләтлелеге. Һәләтлелекте үҫтереү. Эшкә һәләтлелек.*

**ҺӘЛӘТЛӘҮ** *к.* Тиҙләтеү, ашыҡтырыу. *Һәләтләп барыу. Һәләтләп эшләү.* ■ *Һәләтләп мәкегә карай .. кор санаһына якшы сбруй менән бына тигән ат еккән .. Әкбәр шыйлатып .. уҙып китте.* Т. Хәйбуллин.

**ҺӘЛӘТСЕЛ** *с.* Яйын-йүнен килтереп эшләй белеүсән; уңған. *Һәләтсел егет.*

**ҺӘЛӘТҺЕҘ** *с.* Һәләте юк; булдыҡһыҙ. *Һәләтһеҙ кеше.*

● *Һәләтһеҙ һәнәк һындырыр, көсһөҙ көрәк һындырыр.* Мәҡәл.

**ҺӘЛӘҮЕР** *с. диал.* Мәләү.

**ҺӘМ** [*фарс.*] *йыйыу терк.* Тиң дәрәжәле һүҙ һәм һөйләмдәрҙе йыйып теркәй. *Ер һәм күк. Өҫтәл һәм ултырғыс.* ■ *Рус һәм башҡорт дуҫлығын һүтелмәҫ итеп төйнәгән Салауат кеүек ир кайҙа?* Р. Ниғмәти. *Йокла, йөрәгем, йырҙар йырлармын һәм матур итеп әкиәт һөйләрмен.* М. Хәй.

**ҺӘМГЕЛСӘК** *и. диал.* Сәңгелдәк.

**ҺӘМЗӘ** *и.* Ғәрәп алфавитында хәреф исеме (тамаҡ төбө менән өҙөп әйтелә торған тартынҡы өн; башҡорт телендә ғәрәп теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙәге һәмзә өнөн «ь, ъ» билдәләре күрһәтә, мәҫ. **тәьмин, тәьҫир** һ. б.).

**ҺӘМИШӘ** [*фарс.*] *р. иҫк. кит.* Һаман, һәр ваҡыт. *Егерменсе ғасырҙа беҙ һәмишә ятмайыҡ йоклап.* Ш. Әминев. *Яуызлыҡ ҡылаһың донъя һәмишә, ҡылырһың һин кояшлы көндө кисә.* М. Ғафури.

**ҺӘММӘ** [*фарс.*] *билд. а.* Бөтә булған; бөтә, барлыҡ. *Һәммә кеше. Һәммә халыҡ. Һәммә эш. Һәммәһе бергә.* ■ *Мин китер сакта ғына һөйкөмлө күренә һәммә шәй.* Ш. Бабич.

**ҺӘМСЕҮ** *к. диал.* Әҙәйеү, кәмеү.

**ҺӘМСӘҒӘТТӘ** *р. диал.* Һәғәттә. *Һәмсәғәттә барып килеү.*

**ҺӘМӘН** *и. һөйл.* Аҡса тигән мәғәнәлә йәшерен һүҙ итеп ҡулланыла. *Һәмәнең бармы?*

**ҺӘНДЕРӘ** *и.* **1.** Мейес артында юғарыға күтәреп яһаған урын аҫты (ҡыш көнө бәрәс, быҙау өсөн, өҫтө төрлө кәрәк-яраҡ һалыу өсөн ҡулланыла). *Мейес менән йәнәшә бер һәндерә бар. Был йылдарҙа уның [Ҡансыуаровтың] бер тапҡыр ҙа һәндерәлә йоклағаны юк.* С. Агиш. / Вагон, пароход, казарма һ. б. ерҙә бейек итеп яһалған ултырыу, йоҡлау һәм нәмәләр ҡуйыу өсөн эшләнгән махсус урын. *Ике тәүлек буйына купе лә дүрт кеше тығылып бара. Гөлкәйҙең урыны уң яктағы һәндерәлә ине.* Ф. Рәхимғолова. *Вагон ике ҡат һәндерәле булып, беҙгә өҫкө ҡатта барырға тура килде.* Ғ. Хәйри.

**2.** Йәшелсә һ. б. ҡарауыллағанда тирә-яҡты алыҫтан күреү өсөн юғары күтәреп яһалған урын. *Ҡарбуз, ҡауынды, бабайҙар һәндерә һалып ҡарауылланылар.*

**3.** *диал.* Лапаҫ, эйеҫлек. *Вәли ағай тирләгән маңлайын .. еңе менән һөртә-һөртә аҙбар һәндерәһенә бесән өйөп маташа ине.* Ғ. Лоҡманов.

**4.** *диал.* Эләүкә. *Һәндерәлә сабыныу.*

**5.** *диал. кар.* **урҙа**[1] 1. *Һәндерәгә ҡаралды элеү.*

**6.** *диал.* Һауыт-һаба һ. б. кәрәк-яраҡ ҡуйыу өсөн стенаға эшләнгән таҡта кәштә. *Һәндерәгә һауыт-һаба ҡуйыу.*

**ҺӘНДӘСӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Геометрия. *Башланғыс һәндәсә.*

**2.** Инженерлыҡ эше.

**ҺӘНҮЗ** *р. кар.* **һануз.** *Мансурҙың күңеле һәнүз Ғәлиәне уйлай, ике күҙе Ғәлиәне күҙләй ине.* Ә. Иҫәнбирҙин.

**ҺӘНӘК** *и.* **1.** Бесән, һалам һ. б. сәнсеп алыу, таратыу өсөн хужалыҡта ҡулланылған оҙон һаплы, саталы эш ҡоралы. *Ағас һәнәк. Тимер һәнәк. Өс саталы һәнәк. Һәнәк һабы.* ■ *Эҫе йәйге көндә янып, һәнәк тотоп кәбән койҙом.* Р. Ниғмәти. **Көлтә һәнәге** ике саталы бәләкәй ағас һәнәк. **Күкрәк һәнәге** кәбәндең күкрәген һалыу өсөн ҡулланылған оҙон өс саталы ағас ҡыҫҡа һәнәк. **Ос һәнәге** кәбән ослағанда ҡулланыла торған оҙон һаплы ағас һәнәк. *Ос һәнәген үҙем тотоп ырғытырмын тотоп күбәне.* Р. Ғарипов. **Төп һәнәге** кәбәндең төбөн һала торған ҡыҫҡа һаплы, оҙон өс саталы ағас һәнәк.

**2.** Башҡорт ырыуында тауҙылар, сүкәнәй һ. б. аймаҡтарҙың тамғаһы.

● *Һәләтлене һәнәк тотоуынан күреп була.* Әйтем. *Һәнәге ҡыйбат түгел, йәпләгәс ҡыйбатлана.* Әйтем.

**ҺӘНӘКСЕЛӘР** *и. тар.* 1920 йылда кулактар ҡотҡоһо менән советҡа ҡаршы сыҡҡан фетнәсе крәҫтиәндәр. *Һәнәкселәр фетнәһе.*

**ҺӘҢГЕЛСӘК** *и.* Сәңгелдәк элә торған нәҙек оҙон, шыйыҡ, һығылма ағас.

**ҺӘҢГӘР** [1]: **йәшел һәңгәр** баҡыр купоросы.

**ҺӘҢГӘР** [2]: **кейәү һәңгәре** *диал.* кейәү үҫере. *Мөхәмәтҡол кейәү һәңгәре булып ауылға атҡа атланып бара..* Ғ. Сөләймәнов.

**ҺӘПРӘ** *с.* Таҙалыҡты, бөхтәлекте белмәгән, эшлекһеҙ; әрпеш, шамтыр. *Һәпрә ҡатын. // [Әхмәтша — Сәрбиямалға:] Ниңә лавканы иртә яптың, һәпрә!* З. Биишева. **Һәпрә ҡойолоу** бысраҡ, әрпеш булыу йәки насар, алама кейенеү. *Һәпрәһе ҡойолоп йөрөй.* ■ *Байлыҡ ул бер көнлөк .. Алама булһаҡ та һәпрәбеҙ ҡойолоп йөрөһәк тә, беҙҙең кәрәгебеҙ тейәр.* Т. Хәйбуллин.

**ҺӘПРӘЙЕҮ** *ҡ.* Йыйнаҡһыҙ, шамтыр булыу. *Хаҡым юҡ һәпрәйеп йоҡлап ятырға, ябынып гәмһеҙлек юрғанын.* Ш. Биҡҡол.

**ҺӘПРӘЛЕҮ** *ҡ.* Бысраҡҡа ҡатып, өҫ-баш туҙып, саҡ ҡуҙғалыу; шамтырау. *Һәпрәлеп йөрөү.*

**ҺӘПРӘНДӘҮ** *ҡ.* Эшһеҙ, буштан-буш йөрөү. *Һәпрәндәү йөрөмә, эш эшләп өйрән.*

**ҺӘПТЕРКӘ** *и.* Ҡатын-ҡыҙ күлдәгенең итәк осона һалынған киң ҡатмар. *Һәптеркәле күлдәк. Һәптеркә һалып тегеү.*

**ҺӘПТЕРКӘЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **һәптеркәләү**. *Күлдәкте һәптеркәләтеү.*

**ҺӘПТЕРКӘЛӘҮ** *ҡ.* Һәптеркә һалыу, һәптеркә тотоу. *Күлдәкте һәптеркәләп тегеү.*

**ҺӘПТӘН** *и.* **1.** Буштан-буш темеҫкенеп эшһеҙ йөрөгән кеше. *«Төндә йөрөгән ниндәй һәптән был»,— тип, муйнаҡтар ларҫ-лорҫ өрөп тороп ҡалдылар.* Б. Вәлит.

**2.** Өй тирәһендәге ваҡ-төйәккә тейеүсе, алып китеүсе кеше. *Ҡотлозаман малайҙы сыбыҡлап-сыбыҡлап, өҙгән ҡыярҙарын муйынына баулап, башҡа һәптәндәргә һабаҡ булһын тип, йәйге эҫелә оло ҡапҡа алдына баҫтырып ҡуйған.* Ғ. Вәлиев. **Һәптән ҡараҡ** ваҡ-төйәк нәмәне урлап йөрөгән уғры.

**ҺӘПТӘНЛӘҮ** *ҡ.* Эшһеҙ, бушҡа өй араһын ҡыҙырып йөрөү. *[Мөслимә — Фәйзуллаға:] Әллә ниндәй мутлығы бар кеше шикелле, ҡайҙа улай бышын-бышын ғына һәптәнләп йөрөйһөң?* Ф. Исәнғолов. *[Ҡатын:] Мәрфуға килен! Минең Әптелмәнем йөрөмәйме шунда һәптәнләп?* С. Кулибай.

**ҺӘПӘЙТЕҮ** *ҡ.* Бөтөрөү, юҡ итеү (аҙыҡты). *Бер туҫтаҡ ашты һәпәйткән.*

**ҺӘПӘЛТЕР** *с. диал.* Йүнһеҙ.

**ҺӘПӘЛӘК**[1] *и.* Күҙ бәйләш, өйҙә уйнай торған балалар уйыны (берәүҙең күҙен бәйләйҙәр, башҡалары унан тотторմаҫҡа тырыша; кем тотола — шуның күҙен бәйләйҙәр; шулай дауам итә). *Һәпәләк уйнау.*

**ҺӘПӘЛӘК**[2] *и.* Һалбыр ҡолаҡлы һунар эте төрө. *Заятүләктең бер күк дүнәне, аҡ шоңҡары, бер һәпәләк эте булған.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ҺӘПӘЛӘН** *с. диал.* Ҡабалан. *Һәпәлән кеше.*

**ҺӘПӘРЕЛЕҮ** *ҡ. ҡар.* **һәпрәлеү.**

**ҺӘР** [*фарс.*] *билд. а.* **1.** Дөйөм төркөмдәге кеше йәки нәмәне айырым-айырым баҫым менән билдәләгәндә ҡулланыла. *Һәр кеше. Һәр нәмә.* ■ *Һәр вагон ишегендә ҡарауыл ҡуйҙылар.* Д. Юлтый.

**2.** Берҙән артыҡ һанды аңлатҡан һүҙҙәр менән килеп, шул һандағы кеше йәки нәмәнең берләштереп әйтелгәнен белдерә. *Һәр өсөһө бер төркөм.* ■ *Һәр икеһен бергәләп ҡушҡас, яралған бер мәләк.* Ш. Бабич.

**3.** Урын ваҡыт һүҙҙәре менән килеп, ҡушма рәүеш яһай. *Һәр ваҡыт. Һәр ерҙә. Һәр йәһәттән. Һәр кис.* ■ *Һәр көн баҙарға сығып, .. урын эҙләп йөрөй башланыҡ.* Т. Йәнәби.

**4.** Һорау алмаштары һәм «бер» һүҙҙәре менән килеп, билдәләү алмашы яһай. *Һәр ҡайһы. Һәр ни.* ■ *Һәр кем эшләр белгәнсә, ҡул көсөнән килгәнсә.* Ғ. Амантай. *Зәйнәп уны тыңлай йотлоғоп, бүләк килтерә һәр бер килгәндә.* Ғ. Сәләм.

◆ **һәр береһе** бөтәһе, һәммәһе; һәр ҡайныһы. *Егеттәрҙең һәр береһе үҙ уйына сумып бара ине.* Һ. Дәүләтшина. **һәр төрлө** төрлө-төрлө. *Гөлнур өҫтәлдәге һәр төрлө ҡағыҙ, папкаларҙы унан-бынан ҡараштырып алды.* М. Тажи. **Һәр хәлдә** *иш.* нисек кенә булмаһын. *Сабырға, йөрөргә ҡалһа, уларҙан уҙмаһам, һәр хәлдә, ҡалышмам.* С. Агиш.

**ҺӘРАМЗА** *с. ҡар.* **арамъя.** *Һәрамза булыу.*

**ҺӘРГИЗ** [*фарс.*] *р. иҫк. кит.* Һәр ваҡыт, һәр саҡ. *Атҡан уҡтарыбыҙ һәргиз кейеккә туктамайҙар.* «Батыршаның хаты».

**2.** Бер ваҡытта ла, һис бер ваҡыт. *Был халыҡ холоҡ менән һәргиз уңмай, .. донъяға зирәклеге Әфләтундай.* Аҡмулла.

**ҺӘРГӘҮ** *и.* Ағас ҡабығын ҡуптарыу өсөн ағастан яһалған ҡорал. *Садрый һәргәүе менән ҡайырҙы ярып, һалабашын ҡуптарып ала.* Н. Мусин.

**ҺӘРҘӘНДӘҮ** *ҡ. диал.* Һәрпәнләү.

**ҺӘРЕШЕҮ** *ҡ. диал.* Бәйләнеү. *Кешегә һәрешеү.*

**ҺӘРКӘШ** *с. диал.* Һөҙгәк. *Һәркәш үгеҙ.*

**ҺӘРМӘКЛӘҮ** *ҡ.* Кемделер, нимәнелер ҡул йөрөтөп тотҡолап ҡарау, ҡапшау. *Бер-бер нәмә онотолоп ҡалманымы икән тип, Хәким .. арбаға тейәлгән нәмәләрен һәрмәкләп ҡараны.* Я. Хамматов.

**ҺӘРМӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Күрмәгән көйө унан-бынан тотҡалап ҡарау. *Һәрмәләнеп йөрөү.* ■ *Әкрен генә һәрмәләнә торгас, ул ҡапҡаның бағанаһы эргәһендә ҡул ҡуйырлыҡ тишек тапты.* И. Көҫәпҡол.

**ҺӘРМӘЛӘҮ** *ҡ.* Унан-бынан ҡапшау. *Бабайҙар һәрмәләй, малайҙар үрмәләй.* Ш. Бабич.

**ҺӘРМӘНЕҮ** *ҡ.* Күрмәгән көйө, ҡул йөрөтөп эҙләнеү, тотҡолап ҡарау. *Гөлгөнә ҡараңғыла һәрмәнә-һәрмәнә алмаларҙы йыя.* Ш. Янбаев.

**ҺӘРМӘҮ** *ҡ.* Күрмәгән көйө ниҙәлер табыр йәки тотоп ҡарар өсөн ҡул йөрөтөү. *Һәрмәп ҡарау. Кеҫә һәрмәү.* ■ *Килгән кеше ишек тотҡа-*

*һын һәрмәп, оҙаҡ ҡына ҡыштырланы.* Ф. Иҫәнғолов.

**ҺӘРМӘҮЕС** *и.* Ҡорт, бөжәк, әкәм-төкәмдәрҙең оҙон үҫенде рәүешендәге һиҙеү, тотоу ағзаһы. *Һигеҙаяҡтың һәрмәүесе.*

**ҺӘРМӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **һәрмәү.**

**ҺӘРПӘЙЕҮ** *ҡ. диал.* Һалпайыу.

**ҺӘРПӘК**[1] *и.* **1.** Билгә тағып йөрөй торған ҡынлы һуғыш балтаһы.

**2.** Утын яра торған ҡалын балта.

● *Яманға юлдаш булһаң, һәрпәгең билеңдә булһын.* Мәҡәл.

**ҺӘРПӘК**[2]: **һәрпәк һаҡал** *диал.* сүсәнәк һаҡал.

**ҺӘРПӘНЛӘТЕҮ** *ҡ.* **1.** Һәрпәнләп йөрөргә юл ҡуйыу.

**2.** Һалп-һолп ҡуҙғалтыу. *Һәрпәнләтеп алып барыу.*

**ҺӘРПӘНЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Эшһеҙ-ниһеҙ өй беренсә күп йөрөү. *[Вакиға ханым:] Һәрпәнләп оҙаҡ йөрөмә.* С. Кулибай.

**2.** Һалп-һолп итеп, ауыр ҡуҙғалыу; һалпанлау. *Йәйәү көйө һәрпәнләп бер нисә көн барғас, Бикйән Ағауыз йылғаһы буйындағы йәйләүгә барып сыкты* (Әкиәттән).

**ҺӘРТ** *и. диал.* Сәбәп, касафат.

**ҺӘРӘМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Күп ҡатын алыу хөкөм һөргән көнсығыш мосолман илдәрендә өйҙөң ҡатындар торған яғы.

**2.** *йыйн.* Мосолман кешеһенең ҡатындары.

**ҺӘРӘПСЕ** *с.* Өйҙән-өйгә темеҫкенеп йөрөгән ауылсы; тоҡһоҙ хәйерсе.

**ҺӘРӘПСЕЛЕҮ** *ҡ.* Урам араһында темеҫкенеп йөрөү. *Һәрәпселәп йөрөү.*

**ҺӘТТӘЙ: һәттәй үк** *диал.* арыу уҡ. *Һәттәй үк эшләп ташлаған.*

**ҺӘТӘҮ** *с.* Аҡылға кәм; ахмаҡ, аңра. *[Олтанбикә:] Илап та бара, һәтәү* (Әкиәттән).

**ҺӘТӘҮЛӘНЕҮ** *ҡ.* Һәтәүгә әйләнеү, һәтәү булыу. *[Сафа:] Тулабай ағай!.. Хәҙер төш атыңдан, ни һәтәүләнеп йөрөйһөң, хәҙер үләһең бит!* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**ҺӘҮЕР** [*ғәр.*] *и.* **1.** *(баш хәреф менән) астр. иҫк.* Ун ике бөрөждөң береһе (Хәмәл менән Жәүзә араһында урынлашҡан).

**2.** Ҡояш календары буйынса икенсе айҙың ғәрәпсә исеме (22 апрель — 21 май). *Ап-аҡ ҡына ап-аҡ ҡарҙар яуа, иреп бөтөр микән һәүерҙә* (Халыҡ йырынан).

◆ **һәүер намаҙы** мәйет үлгәс алып сығыр алдынан уҡыла торған намаҙ.

● *Һәүер килмәй яҙ булмаҫ.* Әйтем.

**ҺӘҮЕРЕК** *и.* Өйөргә ҡушыу өсөн өлгөрөп етмәгән йәш айғыр малы. *Һәүерек булыу.* ■ *Бай аттарын ҡарап сыға ла: Алты ҡолас ала бейәм ти, саптар һәүерек бүртә айғыр юҡ, ти.* М. Буранғолов. / *күсм.* Өйләнмәй йөрөгән егеткә шаяртып әйтелә.

**ҺӘҮЕРТАШ** *и.* Тимгелләнеп, ҡатланып ыуылып онталырға торған мурт таш.

**ҺӘҮЕТЕМ** *р. ҡар.* **һәүетемсә.**

**ҺӘҮЕТЕМСӘ** *р.* **1.** Тыныс ҡына, әкрен генә, бер яй менән. *Һәүетемсә йәшәп ятыу. Һәүетемсә эшләп йөрөү.* ■ *Үҙебеҙ эш араһында һәүетемсә генә ваҡ-төйәк тураһында һөйләшеп алған булабыҙ.* Р. Солтангәрәев. *Эште һәүетемсә хәл итергә булдылар.* Ш. Насыров.

**2.** Һәйбәт кенә, арыу ғына. *Һин бында һәүетемсә эшләп йөрөйһөң дә, Шакир, Шамсундың хәле ысынлап та мөшкөләрәк шул.* Н. Мусин.

**ҺӘҮКӘШ** *ҡыу.* **1.** Һыйыр малын ҡыуа торған һүҙ.

**2.** *и. мәғ. күсм. ирк.* Һыйыр. *[Фәрхиә:] Һәүкәшем, күҙ ҡарап торған ризығым, донъя афәтендә лә игелегеңде күрҙек, алдағы көндә лә бергә-бергә йәшәргә насип булһын. Атым да, ҡанатым да һин, һәүкәшем.* Х. Ғиләжев.

**ҺӘҮРЕК** *и. ҡар.* **һәүерек.** *Һәүерек айғыр.*

**ҺӘҮ-ҺӘҮ** *саҡ.* Һыйыр малын саҡырғанда әйтелә торған һүҙ. *Ҡуңыр буға, һәү-һәү, ҡуңыр буға, һәү-һәү* (Халыҡ йырынан).

**ҺӘҮӘҪ** [*ғәр.*] *с.* Нимәгәлер күңел һалыусан; ихлас; әүәҫ. *Һүҙгә һәүәҫ. Уҡыуға һәүәҫ.* ■ *Беҙҙең халыҡ йырға һәүәҫ.* М. Кәрим.

**ҺӘҮӘҪКӘР** [*ғәр.*+ *фарс.*] *с.* **1.** Күңел һалыусан; ихлас, һәүәҫ. *Таҡмаҡ, һамаҡ кеүек нәмәгә һәүәҫкәр кешеләр ҙә күп табылды.* К. Мәргән.

**2.** Шул өлкәлә махсус әҙерлеге булмаған көйө үҙ ихласлығы, үҙ теләге менән шөғөлләнгән. *Һәүәҫкәр ансамбль. Һәүәҫкәр радист. Һәүәҫкәр йырсы.* ■ *Шофёрҙың йырын ауылдағы һәүәҫкәр ансамблдең дәртле бейеүе алмаштыра.* Ғ. Әмири. // *Театр һәүәҫкәре.* ■ *Беҙҙең мәктәптең һәүәҫкәрҙәр түңәрәге лә һәйбәт эшләй ине ул йылдарҙа.* З. Биишева.

**ҺӘҮӘҪЛЕК** *и.* Ятраҡан эшкә булған күңел ынтылышы; ихласлыҡ.

**ҺӘҮӘҪЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Һәүәҫкә әйләндереү, һәүәҫ итеү. *Эшкә һәүәҫләндереү.*

**ҺӘҮӘҪЛӘНЕҮ** *ҡ.* Ныҡ күңел биреү; ихласланыу. *Өлкән конюхтың башынан үткәндәрҙе бигерәк тә малайҙар һәүәҫләнеп тыңлай.* Б. Бикбай.

**ҺӘФТИӘК** *и. ҡар.* **әфтиәк.**

**ҺӘФТӘ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Аҙна.

**ҺӘШ** *ҡыу.* Һыйыр малын ҡыуғанда әйтелә. *Шәрәй туҙған көпөһөн беләгенә элеп, ҡыл менән ослаған оҙон сыбыртҡыһын шартлатып: «Һәш, һәш!» — тигән ҡалын тауышы менән ауыл урамдарын яңғыратты.* Т. Йәнәби.

**ҺӘШКЕЛДӘҮ** *ҡ.* Һәш-һәш тип ҡыуыу (һыйыр малын). *Ғәйзулла оҙон сыбыртҡыһын һәшкелдәп шартлатты.* Я. Хамматов.

**ҺӘШ-ТИРГӘ** *ҡыу.* Һыйыр ҡыуғанда әйтелә торған һүҙ.

**ҺӘШ-ТҮКӘ** *ҡыу. ҡар.* **һәш.** *Һәш-түкә, һыртаҡ һыйыр!*

# Ц

**Ц** [цә] Башҡорт алфавитының утыҙ икенсе хәрефе.

**ЦЕ́ЗИЙ** [*рус.* ‹ *лат.*] *и.* Химик элемент, көмөш һымаҡ төҫлө, һелтеле йомшаҡ металл.

**ЦЕЗУ́РА** [*рус.* ‹ *лат.*] *и. кит.* **1.** *әҙ.* Шиғыр юлындағы пауза. *Бәләкәй цезура. Ҙур цезура.* ■ *.. Цезура шиғырҙа ритмик функция ғына түгел, композиция функцияһын да үтәп килә.* Ғ. Хөсәйенов.

2. *муз.* Музыкаль көйҙәге пауза. *Көйлө цезура.*

**ЦЕЛЛОФА́Н** [*рус.* ⟨ *фр.* + *гр.*] *и.* Целлюлозанан эшләнеп, нәмә төрөү өсөн ҡулланылған һыу үткәрмәй торған үтә күренмәле йоҡа материал.

**ЦЕЛЛУЛО́ИД** [*рус.* ⟨ *лат.* + *гр.*] *и.* Нитроцеллюлозанан эшләнеп, өй кәрәк-ярағы, фотопленка кеүек нәмә яһар өсөн ҡулланыла торған, тиҙ генә янып барған ҡаты пластик матдә. // *Целлулоид уйынсыҡ.*

**ЦЕЛЛЮЛО́ЗА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ағастан, үҫемлек һабағынан химик юл менән алынып, ҡағыҙ, яһалма ебәк, төрлө шартлатҡыс нәмә эшләү өсөн файҙаланылған матдә. *Вискоза целлюлозаһы. Целлюлоза цехы.*

**ЦЕМЕ́НТ** [*рус.* + *нем.*] *и.* Һыуға болғатҡас, таш булып ҡата торған минераль онтаҡ сифатындағы төҙөлөш материалы. *Цемент иҙмәһе. Цементтан нигеҙ ҡороу.* ■ *[Юлдың] тирә-яғына бағаналар ултыртылған, бер аҙ барғас, цементтан ҡойолған саҡрым бағаналары осрай.* Д. Юлтый.

**ЦЕМЕНТЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **цементлау.** *Цементланған иҙән.*

**ЦЕМЕНТЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **цементлау.**

**ЦЕМЕНТЛАУ** *к.* **1.** Цемент менән аралаштырыу, цемент менән нығытыу. *Кирбесте цементләп һалыу. Нигеҙҙе цементлау.*

**2.** Цемент менән ҡаплау. *Юлды цементлау.* ■ *Һыланы Әхмәттең атаһы булмә, залдарҙы, цементланы баҫҡыстарҙы, коридорҙарҙы.* М. Сөндөклө.

**ЦЕНЗ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Боронғо Римда: граждандарҙың социаль-политик, хәрби һәм һалым хәлен билдәләү өсөн уларҙың мөлкәтен күрһәтеп үткәрелгән иҫәп.

**2.** Шәхестең теге йәки был политик хоҡуҡ менән файҙаланыу шарты. *Белем цензы. Ер цензы. Милек цензы. Һайлау цензы.*

**ЦЕ́НЗОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Боронғо Римда: граждандар мөлкәтенә иҫәп алыу өсөн һалым түләнешен һәм ижтимағи әхлаҡтың үтәлешен күҙәтеү өсөн ҡуйылған вазифалы кеше.

**2.** Цензура эшен атҡарған кеше. *Китап баҫтырыуға цензор рөхсәте.*

**ЦЕНЗУ́РА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Боронғо Римда: цензор (1 мәғ.) вазифаһы.

**2.** Матбуғатта баҫыла торған яҙмаларҙы, информация сараларын күҙәтеүҙең дәүләт системаһы һәм шул эште башҡарған дәүләт ойошмаһы. *Цензура күҙәтеүе.* ■ *Беҙҙең снарядтарҙың үҙ окоптарыбыҙға төшөп, үҙ һалдаттарыбыҙҙы үлтереүҙәрен тасуир итәм, былларҙың барыһы ла ҡыҙыл ҡара менән цензура тарафынан һыҙыла.* Д. Юлтый.

**ЦЕ́НТНЕР** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Йөҙ килограмға торошло ауырлыҡ үлсәү берәмеге. *Ерҙең биле һығыла, гектар һайын утыҙ центнер иген күтәргәс.* Р. Ниғмәти.

**ЦЕНТНЕРЛАУ** *к.* Центнерға һалыу. *Центнерлап үлсәү. Центнерлап бүлеү.*

**ЦЕНТРАЛИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Урындағы органдарҙың үҙәк власҡа, үҙәккә буйһоноуҙан ғибәрәт булған идара системаһы.

♦ **Демократик централизм** марксистик-ленинсы партияларҙың, шулай уҡ социалистик дәүләттәрҙең ойошоу ҡоролошондағы, эшмәкәрлегендәге һәм социалистик экономика менән идара итеүендәге демократизм (йәғни хеҙмәтсәндәрҙең тулы властлылығы, етәксе органдарҙың һайлап ҡуйылыуы, бөтә етәксе органдарҙың массалар алдында отчетлы булыуы) менән централизмдың (йәғни бер үҙәктән идара итеү, әҙселектең күпселеккә буйһоноуы, тәртип, ҡуйылған маҡсатҡа ирешеү өсөн шәхси мәнфәғәттәрҙең дөйөм мәнфәғәттәргә буйһондоролоуы) ҡушылыуы менән билдәләнгән етәкселек принцибы.

**ЦЕНТРИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* Халыҡ-ара эшселәр хәрәкәтендәге «һул» фразалар менән йәшерелгән, революцион һәм реформистик йүнәлеш араһында урын алырға ынтылған оппортунистик ағым.

**ЦЕНТРИ́СТ** [*рус.*] *и.* Центризм яҡлы кеше.

**ЦЕНТРИСТИК** *с.* Центризм принцибына ҡоролған. *Центристик идеология. Центристик етәкселек. Центристик политика.*

**ЦЕНТРИФУ́ГА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ҙур тиҙлектә әйләнеп, үҙәктән ситкә йүнәлтелгән көс нигеҙендә шыйыҡсаны һура йәки өлөштәргә тарҡата торған аппарат.

**ЦЕППЕЛИ́Н** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Металл каркас өҫтөнән туҡыма менән көпләнгән дирижабль.

**ЦЕПЬ** [*рус.*] *и.* Бер-береһенән билдәле бер алыҫлыҡта урынлашҡан яугирҙар теҙеме. *Беҙ тиҙерәк цепка таралдыҡ.., канауҙарға, ашлыҡ араһына һибелдек.* Д. Юлтый.

**ЦЕХ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Урта быуат Көнбайыш Европа ҡалаларындағы бер һөнәр кешеләрен берләштергән ойошма.

**2.** Промышленность предприятиеһындағы төп етештереү бүлеге һәм шул бүлек урынлашҡан бина. *Мартен цехы. Цех мастеры.* ■ *Шуның өсөн һәр ҡайҙа ла беҙ һулыш алдыҡ еңел, Һин бит үҙ цехыңа ҡайттың, Элекке токарь Клим.* С. Кулибай. *Тышта үҫал елдәр тулҡына, ә цехтарҙа селлә әҫеһе.* Ҡ. Даян.

**ЦЕЦЕ́** [*рус.* ⟨ *банту*] *и.* Йоҡо ауырыуы тарата торған терелэй тыуҙырыусы Африка себене.

**ЦИА́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Азот һәм углеродтан торған ағыулы төҫһеҙ әсе газ. *Циан кислотаһы.*

**ЦИАНЛЫ** *с. хим.* Циан менән ҡатнаш. *Цианлы калий.*

**ЦИВИЛИЗА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Билдәле бер экономик формацияның ижтимағи, рухи һәм материаль үҫеш кимәле. *Европа цивилизацияһы. Грек-рим цивилизацияһы.*

**2.** Алдынғы илдәрҙең хәҙерге культура һәм аң-белеме. *Цивилизацияны һаҡлау.* ■ *Онтала ҡалалар, Цивилизациялар ҡолай һулып, Ҡәһәр һуҡһын һине вәхшилек, .. Терелэрҙе көл итеүсе ут.* М. Ғәли.

**3.** Боронғо йәмғиәт үҫешендәге өсөнсө дәүерҙең иҫкергән атамаһы.

**ЦИГА́Й** [*рус.* цигайский]: **цигай тоҡомло һарыҡ** һарыҡтың нәҙек йөнлө тоҡомо.

**ЦИГЕ́ЙКА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Цигай тоҡомло һарыҡтың эшкәртелгән тиреһе. // *Цигейка бүрек. Цигейка тун.*

**ЦИКЛ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Билдәле бер эш-хәл, күренештең үҫешендә регуляр рәүештә ҡабатла-

нып килгән процесс. *Ағастың бер йыллык үҫеш циклы. Станокты йыйыу циклы.*

**2.** Үҙ-ара бәйле күренештәрҙең йыйылмаһы, эҙмә-эҙлекле теҙеме. *Концерттар циклы. Лекциялар циклы.* / Дөйөм принцип буйынса берләшкән фәндәр төркөмө. *Биологик цикл. Тарихи цикл.* / Дөйөм тема буйынса берләшкән бер үк жанрҙағы әҙәби әҫәрҙәр. *Лирик шиғырҙар циклы.*

**ЦИКЛО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *метеор.* Яуым-төшөмө, көслө еле булған түбән атмосфера баҫымы (иң аҙы үҙәгендә) өлкәһе. *Циклон еле. Атлантика циклоны.* ■ *Космонавтар Ер өҫтөндәге болоттарҙы күҙәтте, тайфундарҙың һәм циклондарҙың барлыҡҡа килеүен ҡараны.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 16 июнь.

**2.** Дауыл. *Тулҡынланған тормош диңгеҙендә талмай йөҙәм, ҡыуам караптар, циклондарға ҡарап һис туҡтамам, йөрәк — мотор, ҡулда ҡанат бар.* Ғ. Амантай.

**3.** Инерция көсөн файҙаланыуға нигеҙләнгән һауа йәки газ таҙартҡыс аппарат. *Шәкәр туҙанын йыйыусы иҫке ҡулайламалар циклондар менән алмаштырылды.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 11 сентябрь.

**ЦИЛИ́НДР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Тура мөйөштө үҙ тирәләй уратып әйләндереүҙән барлыҡҡа килгән геометрик есем. *Цилиндр йөҙө. Цилиндр күләме.*

**2.** *тех.* Шул есем рәүешендәге деталь йәки королма. *Двигатель цилиндры. Цилиндр поршены.*

**3.** Бейек төҙ түбәле, бәләкәй тирәсле баш кейеме.

**ЦИЛИНДРИК** *с.* Цилиндр (1 *мәғ.*) рәүешендәге. *Цилиндрик һауыт.*

**ЦИНК** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Химик элемент, еңел сүкеләнә торған күкһел аҡ төҫлө йомшаҡ металл; ырыҡта, тутыя. *Хлорлы цинк.*

**ЦИНКЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **цинклау.** *Цинкланған деталь.*

**ЦИНКЛАУ** *ҡ.* Цинк менән ҡаплау, цинк ялатыу. *Деталде цинклау.*

**ЦИНКЛЫ** *с.* Составында цинк булған. *Цинклы руда. Цинклы шпат.*

**ЦИНКОГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Типографик баҫма өсөн цинк клише эҙерләү ысулы.

**2.** Шул клишене эшләгән цех йәки предприятие. *Цинкографияға тапшырыу.*

**ЦИРК** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Боронғо Римда: ат ярыштары, гладиаторҙар алыштары һәм башҡа тамашалар үткәрә торған урын.

**2.** Хайуандар менән сығыш яһауҙан һәм акробатика, клоунада, эквилибристика кеүек жанрҙарҙан торған сәнғәт төрө. *Цирк мәктәбе.*

**3.** Шул сәнғәт төрөн тамашасыға күрһәтеү менән шөғөлләнгән ойошма һәм уның бинаһы. *Күсмә цирк. Цирк артисы. Цирк директоры. Циркта эшләү.*

**ЦИ́РКУЛЬ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Түңәрәк һыҙа һәм һыҙыҡтарҙың оҙонлоғон үлсәй торған ике саталы ҡорал; йәзбә.

**ЦИРКУЛЯ́Р** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Бер ойошманың үҙ ҡарамағындағы ойошмаларға йәки айырым кешеләргә ебәргән яҙма бойороғо, директив күрһәтмәһе. *Циркуляр алыу. Циркуляр ебәреү.* ■ *Ячейка бар, унда бер кем юҡ, циркулярҙар килә.., кире китә.* Ғ. Хәйри.

**ЦИРРО́З** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Эске ағзалағы тоташтырғыс туҡыманың ҙурайыуынан һәм шул ағзаның эшмәкәрлеге боҙолоуҙан килгән ауырыу. *Бауыр циррозы. Бөйөр циррозы.*

**ЦИСТЕ́РНА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Шыйыҡ нәмәне һаҡлау өсөн ҡулайлаштырылған ҙур һауыт. *Нефть цистернаһы. Цистерна ҡуйыу.*

**2.** Шыйыҡ нәмәләр ташый торған цилиндрик һауыт рәүешендәге кузовлы машина, вагон һ. б. *Тимер юл цистернаһы.* ■ *Ҡарап торам, шул саҡ янымдан көн яғына китте цистерналар, Уралыма керҙе вагондар.* Ғ. Сәләм.

**ЦИСТИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Һейҙек ҡыуығының шешеүе.

**ЦИТА́ТА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Текстан һүҙмә-һүҙ килтерелгән өҙөк. *Цитата, гәҙәттә, ҙур авторитетлы аҡыл эйәләренән үҙ фекереңде раҫлау маҡсатында килтерелә.* К. Әхмәтйәнов.

**ЦИТОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Хайуан һәм үҫемлек күҙәнәктәренең химик составын, тарихи үҫешен һәм эшен өйрәнә торған фән.

**ЦИТОХИ́МИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Цитологияның тере күҙәнәктәге химик процестарҙы өйрәнә торған бүлеге.

**ЦИ́ТРУС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡабығы эфир майына бай емешле йылы яҡ ағастарының, ҡыуаҡтарының дөйөм исеме (эфлисун, лимон, мандарин һ. б.). *Цитрус ағасы.*

**ЦИФЕРБЛА́Т** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Үлсәү ҡорамалдарының, сәғәттәрҙең теле хәрәкәт итә торған һан күрһәткесле пластинка. *Компас циферблаты. Секундомер циферблаты.* ■ *Лидия Николаевна ялтырауыҡ циферблатлы ҡул сәғәтен алып ҡараны, ваҡыт иртә — ете тулып ҡына килә ине.* Ғ. Әмири.

**ЦИФР** [*рус.* цифра ⟨ *поляк.* ⟨ *ғәр.*] *и.* Һанды белдергән билдә. *Ғәрәп цифры. Рим цифры.* ■ *Имай, таҡтаға аҡбур менән цифрҙар яҙып, Хаяттың хисап белемен тикшерҙе.* И. Насыри.

# Ч

**ЧАБА́Н** [*фарс.* чобон] *и.* Һарыҡ көтөүсеһе.

**ЧАН** *и. ҡар.* **шаң**$^{2}$.

**ЧАСОВО́Й** [*рус.*] *и. ҡар.* **һаҡсы** 1.

**ЧАСТЬ** [*рус.*] *и.* **1.** Айырым бер ғәскәри берәмек. *Авиация часы. Хәрби часть.* ■ *Ҡыҙыл башкорт частары Юденич менән батырҙарса һуғышты.* «Ағиҙел», 1968, № 2. *Беҙ килеп сыҡҡан окопта бөтөнләй икенсе часть ине.* Д. Юлтый.

**2.** Бөтөндө, системаны тәшкил иткән нәмәнең (организм, механизм һ. б.) бер өлөшө. *Запас часть. Сәғәт частары.* ■ *Тракторист эргәһендә үҫмер егет өтәләнеп йөрөй. Ул трактористҡа кәрәкле частар, шөрөптәр, болттарҙы алып биреп тора.* Ә. Вәли.

**ЧАҺАРЪЯР** [*фарс.*] *и. дини* Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең иң яҡын дуҫ юлдашы. *Шунан, пәйғәмбәр үлгәс, чаһаръярҙар: «Был көрьән онотолоп бөтөр, бер ергә яҙып ҡуйырға кәрәк»,— тип, үҙ-ара кәңәш ҡорғандар, ти.* С. Агиш.

**ЧЕК** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* **1.** Банкыға аҡса һалған кеше йәки ойошманың үҙ иҫәбенән күпмелер сумманы алыу йәки күсереүгә биргән документы. *Эштәр үҙ юлы менән дауам итте. «Ташбулатов» тип имзаланған чектар Промбанкыға ҡарай аға торҙо.* И. Насыри.

**2.** Тауар хаҡын түләр өсөн кассаға, шулай уҡ тауарға аҡса түләгәнлеккә кассанан бирелгән квитанция.

**ЧЕКА́** [*рус.*] *и.* Совет власының тәүге йылдарында контрреволюция, саботаж, спекуляцияға ҡаршы көрәш алып барыу өсөн төҙөлгән ғәҙәттән тыш комиссия.

**ЧЕКИ́СТ** [*рус.*] *и.* Чека хеҙмәткәре. *Юлды шартлатыусы ике бандит ҡулына төштө уткер чекистың.* Ғ. Сәләм.

**ЧЕМПИО́Н** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* Спорт ярыштарында еңеп, беренселекте алған өсөн бирелә торған исем һәм шул исемде алған кеше йәки команда. *Абсолют чемпион. Йөҙөү чемпионы. Шахмат чемпионы. Донъя чемпионы.* ■ *Бейеклеккә һикереүҙә лә, оҙонлоҡҡа һикереүҙә лә Хафиз бөтә чемпиондарҙы уҙып китте.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЧЕМПИОНА́Т** [*рус.*] *и.* Спорттың бер төрө буйынса беренселек өсөн үткәрелгән ярыш. *Ил чемпионаты. Донъя чемпионаты. Чемпионатта ҡатнашыу.*

**ЧЕРЕПИ́ЦА** [*рус.*] *и.* Өй башы ябыу өсөн балсыҡтан яндырып яһаған дүрткел ваҡ таҡта. *Черепица түбәле йорт.* ■ *Ҙур ихата эсендә .. баштары черепица менән ябылған бер ҡатлы казармалар теҙелгән.* Ғ. Кәримов.

**ЧЕРКЕ́С** *и.* **1.** *иҫк.* Төньяҡ-көнбайыш Кавказ халыҡтарының революцияға тиклемге рус әҙәбиәтендә ҡулланылған дөйөм атамаһы.

**2.** Ҡарасай-Черкес автономиялы өлкәһе халыҡтарының береһе һәм шул халыҡтың бер кешеһе (Кавказ телдәренең береһендә һөйләшә). *Черкес халкы. Черкес ҡатыны.*

**ЧЕРТЁЖ** [*рус.*] *и. ҡар.* **һыҙма**[1] 1.

**ЧЕСТЬ** [*рус.*]: **честь биреү** ҡулды баш кейеме тәңгәленә күтәреп, хәрбиҙәрсә сәләм биреү. *[Маһира:] Ана, Йәмғи, уксә кағып, честь биреүҙән башканы белмәй.* Х. Ғиләжев.

**ЧЕХ** *и.* Словактар менән бергә Чехословакияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (славян телдәренең береһендә һөйләшә). *Чех халкы. Чех ҡатыны. Чех теле.*

**ЧЕЧЕ́Н** *и.* Чечен-Ингушында йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (иберий-кавказ телдәренең береһендә һөйләшә). *Чечен халкы. Чечен ҡатыны. Чечен теле.*

**ЧИН** [*рус.*] *и. ҡар.* **дәрәжә** 1.

**ЧИНА́Р** [*рус.* 〈 *фарс.*] *и.* Йәшкелт-һоро ҡайырлы, яҫы киртләс япраҡлы бик ҙур көньяҡ ағасы; платан.

**ЧИНО́ВНИК** [*рус.*] *и.* Батша Россияһы һәм буржуаз илдәрҙәге дәүләт хеҙмәткәре. *Ҡайһы бер вольный халыҡтар, сауҙагәрҙәр, чиновниктар ғаиләләре ҡаланан сығалар.* Д. Юлтый.

**ЧИ́СЛЕННИК** [*рус.*] *и.* Йыртып бармалы календарь. *Өсөнсө йылғы численникты уны ҡайҙан табаһың, уны кем йыйып бара?* С. Агиш.

**ЧУКО́Т** *и.* Чукот автономиялы округының төп халкы һәм шул халыҡтың бер кешеһе (палеазиат телдәренең береһендә һөйләшә). *Чукот халкы. Чукот ҡыҙы. Чукот теле.*

**ЧУМ** [*рус.* 〈 *коми*] *и.* Төньяҡ Себерҙә йәшәгән халыҡтарҙың торлаҡ ҡыуышы.

**ЧУМА́** [*рус.*] *и. ҡар.* **тағун.**

**ЧУХО́Н** *и.* Петербург тирәһендә йәшәгән финдәрҙең һәм эстондарҙың революцияға тиклемге атамаһы.

# Ш

**Ш** [ша] Башҡорт алфавитының утыҙ дүртенсе хәрефе.

**ШАБАЛА** [*рус.*] *и. диал.* **1.** *ҡар.* **һоҫҡо**[1]. *Күмерҙе шабала менән һоҫоу.*

**2.** Тишекле сүмес; һөҙгөс.

**ШАБЛО́Н** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* **1.** Бер үк төрлө нәмәне күпләп эшләү өсөн ҡулланылған үрнәк; ҡалып. *Шаблон буйынса эшләү.* / Эшләнгән нәмәнең эшләнеү рәүешен тикшерә торған ҡорал. *Берекмәнең баш инженеры валдарҙың диаметрын үлсәй торған шаблонды ала ла ремонттан үткән вал эргәһенә килә.* Ә. Байрамов.

**2.** *кусм.* Үрнәк рәүешендә ҡулланылып тапалып бөткән берәй төр алым, күренеш; ҡалып. *Ниндәй ҙә булһа берәй геройға бирелгән кушаматтың тарихын асыу алымына нигеҙләнгән хикәйәләр шаблонға әйләнеп китте.* К. Әхмәтйәнов.

**ШАБЛОНЛЫ** *с.* Шаблонға (2 мәғ.) буйһондоролған, тапалған. *Шаблонлы алым. Шаблонлы ҡараш.*

**ШАБЛОНЛЫҠ** *и.* Шаблон (2 мәғ.) булыу сифаты. *Фекер йөрөтөүҙәге шаблонлыҡ.* ■ *Был кисә лә шундай шаблонлыҡтан котолоп бөтмәне.* Ғ. Сәләм.

**ШАБЫР** *оҡш.* Ҡапыл һыу күпләп түгелгәндә, ҡойолғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шабыр итеп һыу түгелеп китте.*

**ШАБЫРЛАТЫУ** *ҡ.* Шабыр-шобор иттереү, шабыр-шобор килтереү. *Ҡабарып, еллән килгән болот тәңгәлебеҙгә етеүе булды, шабырлатып ҡойоп та ебәрҙе.* Х. Түләкәйев.

**ШАБЫРЛАУ** *ҡ.* Шабыр-шобор итеү, шабыр-шобор килеү. *Шабырлап ағыу. Шабырлап ҡойолоу.* ■ *Тәҙрәләргә шабырлап бәрелгән ямғыр тамсылары мине тирбәткән шикелле тойолдо.* Д. Юлтый. / Хәл ҡылымдың *ғп* формаһында ҡушма ҡылымдың беренсе компоненты булып төп мәғәнәне көсәйтә. *[Егет] тун кейеп сәй эсергә ултыра. Шабырлап тир аға ти бының битенән* (Әкиәттән).

**ШАБЫРТМА** *и. диал.* Ҡойма ямғыр.

**ШАБЫР-ШОБОР**, **шабыр ҙа шобор** *оҡш.* Шабыр иткән дауамлы тауышты белдергән һүҙ. *Шабыр-шобор итеү. Шабыр-шобор килеп ағыу.* ■ *[Талипов] шабыр-шобор итеп ниндәйҙер һыуҙы кисеп үтте.* М. Тажи. *Шабыр-шобор ямғыр яуа өй башы ҡалайҙарға* (Халыҡ йырынан).

**ШАҒАРАҠ** *и. һөйл.* Уйын-көлкө мәжлесе. *Шағараҡ ҡороу.* ■ *Тәүге көндө уйын-көлкө, төрлө*

*шагарак, ат саптырыу менән кис итеп таралалар.* «Алпамыша».

**ШАҒБАН** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **шәғбан.**

**ШАҒИР** [*ғәр.*] *и.* Шиғыр яҙған кеше. *Лирик шагир. Тәржемәсе шагир.* ■ *Ә ҡасан һуң колхоздарга тиңдәш якшы шигыр яҙыр шагирҙар.* Ғ. Сәләм. *Шагир — ел ул, донъя, заман еле,— кайҙа булһа, нейгә кагылһа, көйөн шунан ала...* Р. Ғарипов.

**ШАҒИРАНӘ** [*ғәр.* + *фарс.*] *с.* **1.** Күңелде елкендерерлек, шиғри. *Шагиранә матурлык. Шагиранә киңлек.* // *Шагиранә һөйләү.* ■ *Минең быңдагы тормош бик күңелле һәм шагиранә үтте.* М. Ғафури. *Күл өҫтө шагиранә көлөп торһа,.. хоҙайым, ожмахтарың тороп торһон.* Ш. Бабич.

**2.** Тойғоға бай, нескә күңелле. *Артистка [X. Минһажева] иҫтә калырлык шагиранә образ тыуҙырҙы.* «Ағиҙел», 1971, № 1.

**ШАҒИР-ИМПРОВИЗА́ТОР** [*ғәр.* + *рус.*] *и.* Импровизаторлыҡ һәләте булған шағир. *Ф. Д. Нефедов Салауаттың .. шагир-импровизатор булыуына һокланып яҙа.* С. Галин.

**ШАҒИРЛЫҠ** *и.* Шиғыр яҙыуға, поэзияға булған һәләт. *Шагирлыкты миңә лә бит биргән, бер караһаң, хоҙай тәгәлә.* Н. Нәжми.

**ШАҒИРӘ** [*ғәр.*] *и.* Шиғыр яҙған ҡатын-ҡыҙ, ҡатын-ҡыҙ шағир. *Һуңгы йылдарҙа башкорт шагирәләренең, яҙыусыларының ижады бигерәк тә йәнләнде.* Р. Шәкүров.

**ШАҒЫР**[1] *с.* **1.** Ерлегендә аҡ төҫ күп булған. *Шагыр ситса. Шагыр күлдәк. Шагыр яулык.*

**2.** Ағы ҙур (күҙгә ҡарата). *Халык уҙ өмөтөн өс йүгереккә бәйләне. Шуларҙың береһе .. шагыр күҙле ала бейә ине.* С. Агиш.

**3.** *диал.* Аҡ һалған, ҡылау төшкән (күҙгә ҡарата).

**4.** *диал.* Шаҙра, быжырмаҡлы. *Шагыр бит. Шагыр быяла.*

**5.** *диал.* Өлгөрмәгән, сей. *Шагыр еләк.*

◆ **Шағыр болот** бик юғарылағы аҡ төҫтәге бөҙрә болот.

**ШАҒЫР**[2] *окш.* Ҡаты нәмәләр ышҡылғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шагыр итеү. Шагыр итеп капка асылды.*

**ШАҒЫРАЙЫУ** *к.* Ниндәйҙер ерлектә асыҡ булып айырылып тороу, ярылып ятыу. *Шагырайып тороу.* ■ *Аҡ сепрәкте кара еп менән тегеп тә куйҙык .. һул ягын әйләндергәс, кара еп улай ук шагырайып күренеп торманы.* К. Кинйәбулатова. / Яҡты булыу, балҡыу. *Шагырайып күренеү.* ■ *Күҙгө төндөң күге тап-таҙа, йондоҙҙар гына шагырайып карайҙар.* Р. Солтангәрәев.

**ШАҒЫРЛАТЫУ** *к.* Шағыр-шоғор иттереү, шағыр-шоғор килтереү. *Таймаҫ карҙы шагырлата-шагырлата, оло урамга сыга торган тар тыкырыктың караңгылыгына инеп югалды.* Һ. Дәүләтшина.

**ШАҒЫРЛАУ** *к.* Шағыр-шоғор итеү, шағыр-шоғор килеү. *Карауыл өйөнөң туңган ишеге шагырлап асыла.* А. Карнай.

**ШАҒЫР-ШОҒОР, шағыр ҙа шоғор** *окш.* Ҡат-ҡат шағыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шагыр-шогор итеү. Шагыр-шогор килеү.* ■ *Ә капка шагыр ҙа шогор килеп, асылып-ябылып тора, ти* (Әкиәттән).

**ШАДКӘМ** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Шатлыҡ менән тулы; шат. *Шадкәм булыу.*

**ШАДМАН** [*фарс.*] *с. иҫк. кит.* Һөйөнгән, шатланған; шат. *Борон бер Мәсем атлы хан булыпты уҙе акыллы шадман йән булыпты.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ШАҘРА** *и.* **1.** Бит йәки тәндәге ваҡ ҡына уйымдар, быжырҙар (ғәҙәттә сәсәк ауырыуынан була). *Ваҡ шаҙра. Битте шаҙра баҫыу.* ■ *Атайым беҙгә күҙ кыҫып, шым гына көлә. Уның битендәге шаҙралары яҙылып киткәндәй була.* Ш. Янбаев. / *с. мәг.* Битендә ваҡ ҡына уйымдары, быжырҙары булған. *Шаҙра кеше.*

**2.** Нимәнеңдер өҫтөндә хасил булған ваҡ ҡына уйынтылар, быжырмаҡтарға ҡарата әйтелә. *Шаҙраны тигеҙләү.* // *Шаҙра таш.* ■ *Марттың үткер еле кар битен ашап, ваҡ кына шаҙралар яһай.* Һ. Дәүләтшина. **Шаҙра ҡар** иреп, тишектәр хасил булған ҡар өҫтө.

**3.** Һыу өҫтөндәге ваҡ ҡына тулҡындарға ҡарата әйтелә; бөҙөр. *Күл өҫтөндәге шаҙралар.* // *Шаҙра һыу өҫтө.* ■ *Агиҙел өҫтө ваҡ кына шаҙра тулкындар менән капланган.* Ш. Шәһәр.

● *Шаҙра йөрәк яндыра.* Әйтем.

**ШАҘРАЛАНЫУ** *к.* **1.** Шаҙраға әйләнеү, шаҙра булыу. *Сәсәк ауырыуынан бит шаҙраланып калды. Ашалып, шаҙраланып бөткән таш.*

**2.** Ваҡ ҡына тулҡындар хасил булыу. *Йылы, талгын ел иҫте.. Күл өҫтө шаҙраланды.* Ф. Иҫәнғолов. *Шаҙраланып яткан зәңгәр күлгә тигеҙ көҙгө — боҙҙар йүгергән.* Ғ. Мәсғүт.

**ШАҘРАЛАТЫУ** *к.* **1.** Шаҙраға әйләндереү, шаҙра итеү. *Сәсәк битте шаҙралатты.*

**2.** Тулҡынландырыу, бөҙөрҙәр булдырыу. *Ел иҫә. Йылга өҫтөн шаҙралата һоро тулкындар.* Х. Кәрим.

**ШАҘРАЛАУ** *к. һөйл.* Шаҙра (1 мәғ.) итеү. *Сәсәк ауырыуы кешенең битен шаҙралай.*

**ШАҘРАЛЫ** *с.* Шаҙраһы (1 мәғ.) булған. *Шаҙралы бит.*

**ШАҘРАЛЫҠ** *и.* Шаҙра (1 мәғ.) булған хәл. *Бик әҙ генә шаҙралык бар, булһа булһын, зарар юк, кершән якһаң иплә берәк.* Ш. Бабич.

**ШАҘЫР: шаҙыр һыу** *диал.* бик ныҡ; бөтөнләй. *Шаҙыр һыу булыу.*

**ШАҘЫРТ** *и.* Ҡар һыуы төшкән мәл. *Яҙгы шаҙырт. Көҙгө шаҙырт.*

**ШАЖ** *окш.* Ныҡ ҡыҙған тимергә шыйыҡ нәмә ҡойолғанда, етеҙ хәрәкәт менән нимәнелер ҡырҡҡанда, ышҡығанда сыҡҡан йәки һ. б. шундай тауышты белдергән һүҙ; саж. *Таба шаж итеп калды.*

**ШАЖҒЫРЫУ** *к.* Ныҡ итеп шажлау (1, 2 мәғ.). *Шажгырып боҫ бөркөлә.*

**ШАЖЛАТЫУ** *к.* **1.** Шаж-шож иттереү, шаж-шож килтереү; сажлатыу. *Шажлатып коймак койоу.* ■ *Әсәйемдең аласыкта шажлатып коймак майлаганын ишеттем.* Ш. Янбаев.

**2.** *кусм.* Хәл ҡылымдың *-п* формаһында ҡушма ҡылымдың беренсе компоненты булып төп мәғәнәне көсәйтә. *Бына былар [егет менән кыҙ] шажлатып ишек алдына килеп инә* (Әкиәттән).

**3.** *кусм. һөйл.* Ныҡ итеп һыҙыра һуғыу; һыҙыртыу. *Теге тиҫкәрегә берҙе сыбыртҡы менән шажлаттым.* Р. Низамов.

**ШАЖЛАУ** *к.* **1.** Шаж итеү, шаж-шож килеү; сажлау. *Шажлап торған ут.* ■ *Мунсаны нык яҡтыҡ. Юрый ташҡа һыу һибеп ҡараным, шажлап тора.* Р. Низамов.

**2.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында ҡушма ҡылымдың беренсе компоненты булып төп мәғәнәне көсәйтә. *Паровоздар, көслө ФД-лар станцияға шажлап килеп инер.* С. Агиш.

**3.** *көсм. һөйл.* Ныҡ баҙлау, яныу. *Дейеүҙең маңлайында шажлап торған бер күҙе бар, ти* (Әкиәттән).

**ШАЖ-ШОЖ, шаж да шож** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат шаж иткән тауышты белдергән һүҙ; саж-сож. *Шаж-шож итеү.* ■ *Шаж-шож килеп урманда йырлай ҡорос бысҡылар.* Ғ. Ғүмәр.

**ШАЖЫЛДАТЫУ** *к.* Шаж-шож иттереү, шаж-шож килтереү; сажылдатыу. *Шажылдатып ҡоймаҡ ҡойоу.* ■ *Сара еңгә ҡыҙҙан табаһын май сепрәге менән шажылдатып һөрттө.* Ғ. Ғүмәр.

**ШАЖЫЛДАУ** *к.* Шаж-шож итеү, шаж-шож килеү; сажылдау. *Шажылдап самауыр ҡайнап сыҡты.*

**ШАИҒ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Таралған, киң билдәле.

□ **Шаиғ булыу** таралыу. **Шаиғ итеү** таратыу, һәр кемгә билдәле итеү.

**ШАЙ** *мөн. диал.* Буғай. *Ҡайтҡан шай. Алып килмәгән шай.*

**ША́ЙБА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Гайка йәки шөрөп аҫтына һала торған ялпаҡ балдаҡ. *Резина шайба. Тимер шайба.*

**2.** *спорт.* Ҙур булмаған ауыр резина яҫы дүңгәләк (хоккей уйындарының бер төрөндә ҡулланыла). *Шайбаны ҡапҡаға индереү.*

**ШАЙБАЛЫ** *с.* **1.** Шайбаһы булған. *Тимер шайбалы шөрөп.*

**2.** *спорт.* Шайба менән уйнала торған. *Шайбалы хоккей.*

**ША́ЙКА** [*рус.*] *и.* Яуыз эш, енәйәт эшләү өсөн берләшкән төркөм; банда. *Шайка төҙөү. Шайка башлығы.* ■ *Был ат ҡараҡтары шайкаһы ине. Уның менән Иркәбай үҙе атаманлыҡ итте.* Ғ. Әмири.

**ШАЙЛА** *и. диал.* Лайла.

**ШАЙЛАНЫУ** *к. диал.* Әҙерлек күреү; әҙерләнеү. *Шайланып тороу. Ҡунаҡ саҡырырға шайланыу.*

**ШАЙЛАУ** *к. диал.* Әҙер хәлгә килтереү; әҙер итеү, әҙерләү. *Урын ере шайлап, баштары мендәргә генә тейгәйне, иҙрәп йоҡлап та киттеләр.* В. Нафиков.

**ШАЙЛЫ** *с. диал.* Бик шәп, яҡшы. *Шайлы мал.* ■ *[Усман — Әхмәҙигә:] — Ярар, бирмәһә! Ай-баай. Шаплы ҡыҙҙы ни.* Ж. Кейекбаев.

● *Бутҡаң булһа, майлы булһын, уланың булһа, шайлы булһын.* Әйтем.

**ШАЙМА-ШАЙ** *р. диал.* Тартынмай, оялып тормай. *Шайма-шай әйтеү.*

**ШАЙТА́Н** [*ғәр.*] *и.* **1.** Мосолман мифологияһында: төрлө сүрәткә инә алған мифик зат; ен. *Шайтан балаһы.* ■ *Барса шайтан туплаңып, мәхшәр ҡубып, килделәр диңгеҙ кеүек ләшкәр булып.* Ш. Бабич.

**2.** Әрләгәндә, һуҡранғанда әйтелә. *Ах, шайтан, оноттом.* ■ *[Ҡатын — иренә:] Айһай шайтан! Килгән ҡунаҡтарҙы шулай итәләрме ни?* Д. Юлтый. **Ҡарт шайтан** әрләгәндә әйтелә. **Шайтан алғыр[ы]** һуҡранғанда йәки үкенес белдергәндә әйтелә. *[Ғөбәйт:] Математик расчёттарға .. бер аҙ баш етмәй бит әле, шайтан алғыры!* Н. Иҙелбай.

**3.** Сос, мут кешегә һоҡланғанда әйтелә. *Шайтандар [ҡыҙҙар], ниндәй матурҙар, һөйкөмлөләр бит улар! Һын-килбәттәре, йөҙҙәре ҡойоп ҡуйған кеүек килешлеләр.* Д. Юлтый. *[Рәхимә — Булатҡа:] Ай-һай, шайтан малай, йығаһың бит, ҡана, туҡта!* К. Кинйәбулатова.

◆ **Өмөтһөҙ** — **шайтан** өмөттө өҙөргә ярамай тигән мәғәнәлә әйтелә. **Шайтан алмаштырыу** *шул уҡ* **ен алмаштырыу** (*ҡар.* **ен**[1]). **Шайтан арбаһы** *диал.* ҡамғаҡ. **Шайтан ашығы** *ҡар.* **ашыҡ**[1] 1. **Шайтан белһен** билдәһеҙ тигән мәғәнәлә һанға һуҡмайыраҡ әйтелә. *«Һеҙҙең зат,— тине Әмир, бер аҙ шым барғас,— ҡараңғы төшһә, беҙҙең заттан, шайтан белһен, әллә нимәгә ҡурҡа».* Х. Ғиләжев. **Шайтан ботағы** *шул уҡ* **ен ботағы** (*ҡар.* **ен**[1]). **Шайтан күбәләге** *ҡар.* **күбәләк**[1] 1. **Шайтан ҡасырыу** *шул уҡ* **ен ҡасырыу** (*ҡар.* **ҡасырыу**[1]). **Шайтан ояһы** тәртип булмаған, болалы урынға ҡарата әйтелә. **Шайтан таяғы** *бот.* ойошма сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған сәнскәк япраҡлы, алһыу күк йомро сәскәле сүп үләне. **Шайтан туйы** 1) ығы-зығылы, шау-шыулы тамаша; 2) өйөрөлөп юғары күтәрелгән көслө саң бураны; өйөрмә, ҡойон. **Шайтан тубығынан** *ҡар.* **тубыҡ**[1]. **Шайтан тырнағы** *ҡар.* **тырнаҡ. Шайтан үләне** (*йәки* **дегәнәге**) тарбаҡ һабаҡлы, күк тубырсыҡ сәскәле, сәнскеләнеп бөткән ваҡ япраҡлы ҡый үләне. **Шайтан эйәләү** *шул уҡ* **ен эйәләү** (*ҡар.* **ен**[1]).

● *Йортһоҙ — йылан, ерһеҙ — шайтан.* Мәҡәл. *Тәңре ашын шайтан ҡыҙғанған.* Мәҡәл. *Яман ҡатын — шайтан ҡамсыһы.* Әйтем.

**ШАЙ-ШОЙ, шай ҙа шой** *оҡш. һөйл.* Утын бысҡанда сыҡҡан тауышта белдергән һүҙ. *Шай-шой итеү. Шай ҙа шой килеү.*

**ШАЙЫ** *бәйл. диал.* Хәтле, тиклем, саҡлы. *Йоҙроҡ шайы оро.* ■ *Әйтсе, Ҡояш, ҙурмы Ер шары? Йөрәгең шайы ғына ул бары?* Ш. Биҡҡол.

**ШАЙЫҠ** *и.* Ауыҙҙағы биҙҙәрҙән бүленеп сыҡҡан шыйыҡса; һеләгәй. *Шайыҡ ағыу.*

◆ **Шайығы кипмәгән** *һөйл.* балиғ булмаған, йәш, тигән мәғәнәлә әйтелә.

**ШАЙЫҠЛАНЫУ** *к.* Шайыҡҡа буялыу. *Шайыҡланған аҙыҡ.*

**ШАЙЫҠЛАУ** *к.* Шайыҡҡа буяу. *Ҡулъяулыҡты шайыҡлау.*

**ШАЙӘТ** *р. диал. ҡар.* **бәлки** 2. *Һин бит политкомиссар кеше, шайәт, берәр төрлө рәтен табырһың.* И. Насыри.

**ШАКА́Л** [*фарс.*] *и.* **1.** Эттәр ғаиләһенә ҡараған ҡош, йәнлек, күбеһенсә емтек ашай торған шырт йөнлө йыртҡыс йәнлек; сүл бүреһе. *Тимербай ағай шакал ябылған ситлек алдында туҡталып торҙо.* Ә. Байрамов.

**2.** Йыртҡыс тәбиғәтле кеше тураһында. *Ил сигендә шакал көтөүҙәре олоп ҡаршылайҙар һәр таңды.* Х. Кәрим.

**ШАҠ**[1] *оҡш.* Ҡаҡ нәмәгә ҡаты әйбер менән һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шаҡ итеү. Шаҡ иттереп һуғыу.*

**ШАҠ** ² *диал.* Нәрәтә.

**ШАҠ**⁴ *диал. кар.* **сар**². *Ҡуян шағы.*

**ШАҠ**⁴: **шаҡ ҡатыу** 1) һынды турайтып ҡатып ҡалыу; 2) *күсм.* бик ныҡ аптырау; иҫ китеү. *Заманы шул, юкка шаҡ катма, ике илгә һаман бер капка.* М. Басыров.

**ШАҠАЙ** *с. диал.* Иҫәр.

● *Иләнмәгән, һуғылмаған шаҡай һиңә бер күлдәк.* Әйтем.

**ШАҠАЙЫУ** *к. һөйл.* **1.** Туңыуҙан, артыҡ кибеүҙән һ. б. ҡаты хәлгә килеү, ныҡ ҡатыу. *Биҙрәләге һыу шаҡайып туңған.*

**2.** Шаҡ ҡатыу (*кар.* **шаҡ**⁴). *Күпселек ячейка секретарына ташланды: Беҙ бында шаҡайып торорға килмәгән дә.* С. Агиш.

**ШАҠАЛАЙ** *и.* Ҡул-аяҡтың сурайып сығып торған ҡаҡ һөйәге. *Аяҡ шаҡалайы.*

**ШАҠАЛАҠ** *и. диал.* Шайтан ашығы (*кар.* **ашыҡ**¹ 1).

**ШАҠАНТЫН** *и. диал.* Тәңгәл, тапҡыр. *Шул шаҡантын китеп бара ине.*

**ШАҠАРМА** *и.* Ҡыуал, сыбыҡ шаҡарып яһаған кәртә; текмә. *Шаҡарма шаҡарыу.* ■ *Беҙҙең ауыл халҡы борон-борондан шулай ауылды шаҡарма менән уратып алыр булған.* Ғ. Вәлиев. **Шаҡарма ҡапҡа** *кар.* **ҡапҡа** 1.

**ШАҠАРМАЛАУ** *к.* **1.** Шаҡарма менән кәртәләү. *Баҡсаны шаҡармалау.*

**2.** Шаҡарып нығытып бәйләү. *Тау төшкәндә тәгәрмәсте шаҡармалау.*

**ШАҠАРЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **шаҡарыу** *1—4. Шаҡарылып бәйләнгән яулыҡ.* ■ *Уның Гөлйөҙөмдөң шаҡарылған ҡулы, .. аяҡтары бер юлы һыҙлай башланы.* һ. Дәүләтшина.

**2.** Кирегә ҡарай боролоу, артҡа ҡайышыу; ҡайырылыу. *Шаҡарылып илау.* ■ *Ала бейә бер яҡҡа шаҡарылып туҡтап тора.* Б. Бикбай.

**ШАҠАРЫУ** *к.* **1.** Аяҡ-ҡулды, башты көс менән артҡа тартыу; кирегә бороу, ҡайырыу. *Аяҡты шаҡарыу. Беләкте шаҡарыу. Ҡулды шаҡарып бәйләү. Аттың башын шаҡарыу. Шаҡарып тотоу.* ■ *Михаилға бер юлы ике һалдат килеп йәбеште. Ҡулын шаҡарҙылар. Туҡманылар.* Я. Хамматов. *Зөфәр атын ситкәрәк тартып, башын шаҡарҙы.* һ. Дәүләтшина.

**2.** Көс менән ҡутарыу, урынынан сығарыу; ҡайырыу. *Ишекте шаҡарыу.* ■ *Ҡарлы ямғыр ҡоя өҙлөкһөҙ, ел шаҡара ҡыйыҡ таҡтаһын.* З. Биишева. *Таҡталар менән шаҡарғылай торғас, таш аҫҡа шыуышты.* И. Насыри. / *күсм.* Мул итеп умырып алыу. *Шаҡара тешләп ашау.* ■ *Малайҙар икмәкте шаҡара ҡабып, .. сәй эсергә керештеләр.* Б. Бикбай.

**3.** Кирегә әйләндереп бөкләү, артҡа ҡайтарып бәйләү; сөйөү. *Шәлде шаҡарып бәйләү.* ■ *Рәшиҙә .. ҡыҙыл яулыҡты шаҡарып та ҡуйҙы.* Ф. Рәхимғолова.

**4.** Ҡайыра тартып нығытыу, ҡуҙғалмаҫлыҡ итеү. *Тау төшкәндә тәгәрмәсте шаҡарыу. Тәртәне шаҡарып ҡуйыу.* / Аттың башын бороп тәртәгә бәйләү. *Тарантасҡа ултырҙы ла Вафа, атын шаҡарырға кереште.* Ш. Бикҡол.

**5.** Нәҙек ағастарҙы өс буй кәртә аша үткәреп теҙеү, текмә тотоу. *Шаҡарма шаҡарыу. Йәш ағас шаҡарыуға килә.*

**6.** Йүнәлеште үҙгәртеү, бороу. *Уңға шаҡарыу.* / *күсм.* Хәстәрләү, ҡайғыртыу. *[Вәлит] Фәйрүзәне Фәһим менән башлы-күҙле итеү яғын шаҡара ине.* И. Насыри.

◆ **Ауыҙын шаҡарыу** 1) көс менән тартып ауыҙын йыртыу; 2) *күсм.* туҡмау, кәрәген бирeү. *[Ҡолсобай:] Наҡышевтың ауыҙын шаҡармаһам, исемем Ҡолсобай булмаҫ.* Я. Хамматов. **[Тәртәне] кирегә шаҡарыу** кире уйлау, ҡайтауыллау. *«Ҡаһымбай ағай, саҡ ҡына уныңса булманымы, тәртәһен кирегә шаҡарырға әҙер тора», — тип уйланы Бурәнбай.* И. Ғиззәтуллин. **Тәртәне үҙенә шаҡарыу** *кар.* **тәртә.**

**ШАҠБАҪАР** *и. иҫк.* Ауыр нәмәне аҫтан терәтеп күтәртә торған ҡорамал. *Бүрәнәне шаҡбаҫар менән күтәреү.*

**ШАҠЛАУ** *к. диал. кар.* **сарлау**². *Тау буйын ҡуяндар шаҡлап бөткән.*

**ШАҠМА** *и.* Бысаҡ һабының төбөндәге тимер дүңгәләк; сыңға.

**ШАҠМАҠ** *и.* **1.** Тигеҙ алты яҡлы куб формаһындағы геометрик фигура. *Шаҡмаҡ яһау. Шаҡмаҡтарҙан өй яһап уйнау.*

**2.** Шундай формалағы һәр төрлө нәмә. *Шәкәр шаҡмағы. // Шаҡмаҡ шәкәр. Шаҡмаҡ туҡмас.* ■ *Емеш ҡатып өлгөрмәгән йәймәләрҙән тигеҙ эре шаҡмаҡтар яһап, һалма ҡырҡырға кереште.* З. Биишева. / Самауыр ҡайнатыу өсөн дүртkeл ләп ҡырҡылған ағас киҫәге.

**3.** Һиндәйҙер яҫылыҡтағы тура мөйөш, квадрат. *Шахмат таҡтаһының шаҡмағы. Шаҡмағы эре яулыҡ. Шаҡмаҡтарға бүлеү. Шаҡмаҡ яһау // Шаҡмаҡ биҙәк.*

**4.** *кар.* **сатраш**².

**5.** *диал.* Һуғылған ҡалын шәл.

◆ **Шаҡмаҡ ит** *диал.* һум ит.

**ШАҠМАҠЛАНЫУ** *к.* Шаҡмаҡтарға (1—мәғ.) бүленеү, шаҡмаҡтар хасил булыу. *Шаҡмаҡланып ярылыу.*

**ШАҠМАҠЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **шаҡмаҡлау**

**ШАҠМАҠЛАУ** *к.* **1.** Шаҡмаҡ-шаҡмаҡ (1—мәғ.) итеп яһау. *Шаҡмаҡлап бүлеү. Шаҡмаҡлап һуғылған ашъяулыҡ.* ■ *Мәктәпкә барғанда кит тән бешереп һыуытылған .. [бутҡаны] бысаҡ менән шаҡмаҡлап ҡырҡып, ҡағыҙға төрөп алып китәбеҙ.* Й. Солтанов.

**2.** *кар.* **сатрашлау**¹. *Шаҡмаҡлап һыҙыу.* ■ *Өҫтәлдә .. ҡаты ҡағыҙға шаҡмаҡлап йәбештерелгән төрлө ситса киҫәктәре ята.* С. Агиш.

**ШАҠМАҠЛЫ** *с.* **1.** Шаҡмаҡ (1, 2 мәғ.) р үешендәге; киҫәкле. *Шаҡмаҡлы шәкәр.*

**2.** Шаҡмаҡлап һыҙылған, шаҡмаҡтар төшерөлгән. *Шаҡмаҡлы дәфтәр. Шаҡмаҡлы яулыҡ Шаҡмаҡлы күлдәк.*

**ШАҠРАЙТЫУ** *к.* **1.** Ныҡ ҡатыға әйләндереп ҡаты итеү. *Шаҡрайтып туңдырыу.* ■ *Таң алдынан шаҡрайтып һыуытып ебәрҙе.* Т. Килмөхәмәтов.

**2.** Ныҡ, ҡаты итеп тарттырыу. *Билде шаҡрайта быуыу.*

**ШАҠРАЙЫУ** *к.* **1.** Туңыуҙан, артыҡ кибеүҙән һ. б. ныҡ ҡатыға әйләнеү, ҡаты булыу. *Шаҡрайып кибеү. Шаҡрайып туңыу.*

**2.** Бик ныҡ аптырау; шаҡ ҡатыу. *Ишек төбөндә шаҡрайып ҡатып ҡалдыҡ.* Й. Солтанов.

**ШАҠТА** *с. диал.* **1.** Әрпеш, бысраҡ. *Шаҡта кеше.*

**2.** Алама, ныҡ иҫкергән, туҙған. *Шаҡта өй.*

**ШАҠТАЙ** *р.* Арыу уҡ, күп кенә; байтаҡ, ярайһы ғына. *Шаҡтай алыҫ. Шаҡтай ауыр. Шаҡтай бейек. Шаҡтай нығыныу.* ■ *Инде шаҡтай олоғайып барған аҙ һүҙле Ғилман ағай шул уҡ Ҡаракисеү ауылынан ине.* Ә. Вәли. *Мин генәме? Йәштәргә ҡара, улар ҙа бит шаҡтай үҙгәрҙе.* М. Кәримов.

**ШАҠША** *и. диал.* Саҡса.

**ШАҠ-ШАҠАЛАЙ** *и. диал.* Шап-шаҡыр.

**ШАҠ-ШОҠ, шаҡ та шоҡ** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат шаҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шаҡ-шоҡ килеү. Шаҡ та шоҡ шаҡылдатыу.* ■ *Шаҡ-шоҡ ишек ҡағыуға Шәрәфи күҙен асты.* И. Насыри.

**ШАҠШЫ.** *с.* **1.** Таҙа түгел, бысраҡ; әшәке. *Шаҡшы нәмә. Шаҡшы булыу.* ■ *Ҡараусылар бик яҡшы, мал аҫты булмай шаҡшы.* Ф. Дәүләтшин. *Ер йөҙөнән шаҡшы сүпте йыуып, көндәй балҡып күккә, айға мен!* Р. Назаров.

**2.** *күсм.* Намыҫһыҙ, оятһыҙ; әшәке. *Вәхши күҙ, шаҡшы күңел, алдаҡсы тел донъя тулы.* Ш. Бабич. // *Яҡшы булған ерҙә, шаҡшы ла бар, шаҡшының һуң ниҙә гиллаһе?* Х. Назаров. / Әрләгәндә әйтелә. *[Хәҙрәт:] Нимәгә ауыҙығыҙҙы йыраһығыҙ, маймыл күрҙегеҙме әллә, шаҡшылар!* И. Насыри. *Зифа ҡыҙ-ҡыркынды мәсхәрәләп киткән бай шаҡшы.* С. Кулибай.

● *Бер әҙәм бар — алланан яҡшы, бер әҙәм бар — хайуандан шаҡшы.* Әйтем.

**ШАҠШЫЛАНЫУ** *к.* Шаҡшыға (1 мәғ.) әйләнеү, шаҡшы булыу, бысраныу. *Йыумағанға иҙән шаҡшыланған.*

**ШАҠШЫЛАУ** *к.* Шаҡшыға (1 мәғ.) әйләндереү, шаҡшы итеү. *Сүп-сар менән бүлмәне шаҡшылау.*

**ШАҠШЫЛЫҠ** *и.* Әхлаҡ ҡағиҙәләренә һыймаған бысраҡ, насар эш ҡылыҡ. *[Ҡатын — иренә:] Эсеп алып, үҙ өйөңдә, минең күҙ алдында тиерлек әшләнең бит һин был шаҡшылығыңды!* Х. Ғиләжев. *Ә киләләр улар .. ҡасып-боҫоп — шаҡшылыҡ та үс тә, үлем дә.* Р. Назаров.

**ШАҠЫЙ** *с. диал. кар.* **шағыр** [1] 2. *Шаҡый күҙ.*

**ШАҠЫЛДАҠ** [1] *с.* **1.** Шаҡылдап торған, шаҡылдаусан. *Шаҡылдаҡ нәмә.*

**2.** *и. мәғ.* Ҡарауылсыларҙың шаҡылдатып ҡаға торған, бауы тупмаҡ рәүешендәге ҡоралы. *Шаҡылдаҡ ҡағыу.*

♦ **Шаҡылдаҡ таяҡ** бала-саға уйыны (көтөүсе таяҡ менән ағасҡа һуға, бүтәндәре йәшенә; көтөүсе эҙләгәндә, күренмәй генә йүгереп килеп, унан алда шул уҡ ағасҡа һуғырға тырышалар; кем өлгөрмәй — шул көтөүсе була).

**ШАҠЫЛДАҠ** [2] *и. диал.* Таш турғайы (*кар.* **турғай** 1).

**ШАҠЫЛДАТЫУ** *к.* Шаҡ-шоҡ итеп һуғыу; ҡағыу. *Ишек шаҡылдатыу.* ■ *Ҡала бөтөнләй тынды.. Ҡарауылсыларҙың таяҡ шаҡылдатып ҡуйыуы ғына ишетелде, шул тынлыҡты боҙа.* С. Агиш. *Уҫал ел тәҙрә ҡапҡастарын шаҡылдатты.* Р. Ғабдрахманов.

**ШАҠЫЛДАУ** *к.* **1.** Шаҡ-шоҡ итеү, шаҡ-шоҡ килеү. *Үҙенсә бер көй сығарып тәгәрмәстәр шаҡылдай.* З. Хисмәтуллин. *Аяҡтары шаҡылдап, тояҡтары дөңгөлдәп, һыйыр, башмаҡ мөңгөрҙәп, йортоң баҫһын киленсәк* (Туй йырынан).

**2.** Хәл ҡылымдың -*п* формаһында ҡушма ҡылымдың беренсе компоненты булып төп мәғәнәне көсәйтә. *Шаҡылдап ҡатыу. Быйма һыуланып шаҡылдап туңған.*

**ШАҠЫЛДАУЫҠ** *с. кар.* **шаҡылдаҡ** [1] 2. *Шаҡылдауыҡ ҡағыу.*

**ШАҠЫРЛАТЫУ** *к.* **1.** Шаҡыр-шоҡор иттереү, шаҡыр-шоҡор килтереү. *Шаҡырлатып һөйрәтеү.*

**2.** *кар.* **шаҡрайтыу.** *Шаҡырлатып быуыу.*

**ШАҠЫРЛАУ** *к.* Шаҡыр-шоҡор итеү, шаҡыр-шоҡор килеү. *Шаҡырлап тороу.*

**ШАҠЫР-ШОҠОР, шаҡыр ҙа шоҡор** *оҡш.* Ҡаты, ҡытыршы нәмә өҫтөндә шундай уҡ ҡаты нәмәне йөрөткәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шаҡыр-шоҡор итеү. Шаҡыр-шоҡор килеү.*

**ШАҠЫРЫЙ** *с. диал.* Шаҡырлап торған, ҡаты. *Шаҡарый кәнфит.*

**ШАҠЫТЫУ** *к. йөкм. кар.* **шаҡыу.** *Ишек шаҡытыу.*

**ШАҠЫУ** *к.* Шаҡ-шоҡ һуғыу; ҡағыу; шаҡылдатыу. *Ишек шаҡыу. Ҡапҡа шаҡыу.* ■ *Тышта һалҡын, көҙгө ел ҡотора. Тәҙрә шаҡый ямғыр бөртөгө...* Ғ. Сәләм. *Эй, уҙғынсы! Ҡапҡамды һин үтмә урап, шаҡымай ин. Кемлегеңде тормам һорап.* М. Кәрим.

**ШАҠЫ-ШОҠО** *и. йыйн.* Йыйын ваҡ-төйәк нәмә; ҡый-һай. *Ата сыйырсыҡ оя яһау өсөн шаҡы-шоҡо ташыны, ә инә сыйырсыҡ оя яһаны.* З. Хисмәтуллин.

**ШАЛ** [1] *и.* Йорт ҡаралдыһы буяй торған майлы буяу. *Аҡ шал. Һары шал. Шалһыҙ иҙән.* ■ *Хәйретдин һары шалға буялған таҙа иҙән буйлап үтергә ҡыймаңы.* Я. Хамматов. *Тимерҙәр тутыға ҡыҙарып, тышындағы шал бөтһә.* Ж. Кейекбаев.

**ШАЛ** [2] *и. диал.* Шәл.

**ШАЛАҠ** *с. һөйл.* Сәсе ҡойолған; ялтас. *Шалаҡ баш.*

**ШАЛАП** *и. диал. кар.* **айран** [1]. *Бер туҫтаҡ шалап. Шалап эсеү.*

**ШАЛАПАЙ** [*рус.* шалопай] *и. һөйл.* Елғыуар, йүнһеҙ тигән мәғәнәлә әйтелә. *Ышан шул шалапайҙарға. Береһе бер һүҙ әйтһә, икенсеһе бишле өҫтәргә тора.* Н. Мусин.

♦ **Алапай менән шалапай** гел бергә йөрөгән ике эшлекһеҙҙән көләп әйтелә.

**ШАЛБАЙЫУ** *к. диал.* Шалпайыу.

**ШАЛҠАН** *и.* **1.** Әүернә сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған ике йыллыҡ үҫемлек, йәшелсә. *Шалҡан орлоғо. Шалҡан сәсеү.*

**2.** Шул йәшелсәнең ашай торған аҡһыл һары төҫтәге тумалсаҡ тамыры. *Аҡ шалҡан. Һары шалҡан. Йомро шалҡан. Оҙонса шалҡан.* ■ *Эй һөйрәйем һабағынан, тик тора шалҡан ҡатып, йәшеренгән урынынан көскә сығарҙым тартып.* Г. Юнысова. **Аңра шалҡан** малға ашата торған эре аҡ шалҡан.

♦ **Тиле шалҡан** әүернә сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған һары сәскәле ҡый үләне. *Ҡырлы ҡурай, балтырғандар яланды аҡ төҫкә, тиле шалҡан — һары, торна бото, ҡыңғыырау сәскәләре күк төҫкә*

*буяй.* Я. Хамматов. **Шалҡан сәсерлек** бик нык керләнгән, бысраҡ (ҡолаҡҡа, муйынға ҡарата). *[Илгиҙәр Сәлихкә:] Бынау ерендә йыу, Сәлих ағай. Ҡап-ҡара. Шалҡан сәсерлек булған.* Ш. Бикҡол. **Шалҡан тартыу** балалар уйыны (билдән ҡосаҡлашып, бер-бер артлы теҙелеп ултыралар; «Әбейҙән» көтөүсе шалҡан һорай; бирмәгәс, береһен тартҡылай башлай; уны ысҡындармаҫҡа тырышалар; ысҡынған береһе уйындан сыға тора).

● *Егә белһәң, шайтан да ат була, үҫтерә белһәң, шалҡан да аш була.* Әйтем.

**ШАЛҠЫ** *с.* **1.** Тейешенсә нығытылмаған, нык итеп беркетелмәгән. *Шалҡы баҫма. // Атты шалҡы егеү.* ■ *Буран туҙа... Йорттарҙың түбәһендә ҡаҡылдаша шалҡы таҡталар.* Б. Вәлит.

**2.** *күсм.* Тәртибе бушаҡ, тыйнаҡһыҙ, еңел холоҡло. *Шалҡы ҡатын. Шалҡы булыу. // Йә инде, уныһының [Фатиманың] кис булып бөткәс һепертке өсөн шунда барыуын, Хөсәиндең кәзә тәкәһе шикелле шул шалҡының артынан эйәреүен әйт әле һин уның.* Ж. Кейекбаев.

**3.** *диал.* Әрпеш, бысраҡ.

**ШАЛҠЫЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Шалҡыға әйләнеү (1 мәғ.) әйләнеү, шалҡы булыу. *Шалҡыланған арба.*

**2.** *диал.* Бысраныу, әрпешкә әйләнеү.

**ШАЛЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **шаллау.** *Шалланған иҙән.*

**ШАЛЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **шаллау.**

**ШАЛЛАУ** *ҡ.* Шалға буяу. *Тәҙрә шаллау.*

**ШАЛМАН** *и. диал.* Ялман.

**ШАЛПАЙТЫУ**[1] *ҡ.* Яҫы, ҙур итеп һалындырыу; һалпайтыу. *Ауыҙҙы шалпайтыу.*

**ШАЛПАЙТЫУ**[2] *ҡ.* Яҫы, ҙур булып аҫҡа табан һалыныу; һалпайыу. *Ауыҙы шалпайған. Шалпайып төшөү.* ■ *[Бер сусҡа] килеп сыҡты. Бегемот ҙурлығы булыр. Эсе шалпайған, .. имсәктәре ергә тейә яҙып килә.* Д. Юлтый.

**ШАЛПЫҠ** *с.* Шалпайып аҫылынып **төшкән;** һалпы. *Шалпыҡ ауыҙ. Шалпыҡ ирен.*

**ШАЛТ** *оҡш.* Нәмәләр бер-береһенә нык итеп һуғылғанда, мылтыҡтан атҡанда һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; шарт. *Шалт итереү. Шалт иттереп һуғыу.* ■ *Ул [Асатай] шалт баҫып, .. рапорт яһаны.* Һ. Дәүләтшина. *Әсгәт алып пистолетын, шалт атып та ебәрә.* С. Кулибай.

**ШАЛТАН** *р.* Йөкһеҙ, буш. *Шалтан йөрөү. Шалтан ҡайтыу.*

**ШАЛТАУ** *и. ҡар.* **шәлтәү 1.**

**ШАЛТ-ШОЛТ, шалт та шолт** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат шалт иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шалт-шолт итеү. Шалт та шолт килеү.* ■ *Зариф .. счет төймәләрен шалт-шолт һуғып ултыра ине.* С. Агиш.

**ШАЛТЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Шалт-шолт иттереү, шалт-шолт килтереү.

**ШАЛТЫЛДАУ** *ҡ.* Шалт-шолт итеү, шалт-шолт килеү. *Һәр береһендә шалтылдап торған ҡорал.* Һ. Дәүләтшина.

**ШАЛТЫР** *оҡш.* Ҡаты нәмәләр ҡойолоп төшкәндә йәки бер-береһенә бәрелгәндә сыҡҡан дауамлы тауышты белдергән һүҙ. *Һалдат ҡапсыҡтың ауыҙы сисеүле икәнде белмәй, төбөнән тотоп күтәргән икән, ундағы аҡсалар шалтыр итеп китте, ти* (Әкиәттән).

**ШАЛТЫРАҠ** *и.* Ҡолондо, малды бәйләгән бау сиратылып ишелмәһен өсөн ҡуйылған сығыр рәүешендәге ҡулайлама. *Йәш килендәр .. ҡолондарҙың башын шалтыраҡҡа тығып елегә бәйләйҙәр ине.* М. Буранғолов.

**ШАЛТЫРАТЫУ** *ҡ.* Шалтыр-шолтор иттереү. *Малай барып йүгәнен шалтыратһа, насар ғына бер ат боролоп ҡараған* (Әкиәттән).

**ШАЛТЫРАУ** *ҡ.* **1.** Шалтыр-шолтор итеү; шалтыр-шолтор килеү; шалтырлау. *Сыңйыр шалтырай. Һауыт-һаба шалтырай.* ■ *Бер ваҡыт урман араһынан ҡыңғырау шалтыраған, саңҡылдап эт өргән тауыш ишетелә башланы.* М. Ғафури. *Салауаттың аяҡайында быгау шалтырай* (Халыҡ йырынан). / *күсм.* Асыҡ йөҙ күрһәтеү. *Шалтырап тороу. Шалтырап ҡаршы алыу.*

**2.** *ҡар.* **шылтырау 2.**

**ШАЛТЫРАУЫҠ** *с.* **1.** Шалтырап торған, шалтыраусан, тауышлы. *Шалтырауыҡ нәмә. Шалтырауыҡ уйынсыҡ.*

**2.** *күсм.* Яңғырауыҡлы һүҙҙәр менән ҡабартып әйтелгән, буш йөкмәткеле. *Шалтырауыҡ һүҙ.* ■ *Шәхес культы поэзияны, айырыуса лириканы, бер төрлөлөккә — шалтырауыҡ риторикаға дусар итергә тырышты.* К. Әхмәтйәнов.

**ШАЛТЫРАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **шалтырау 1.**

**ШАЛТЫРЛАУ** *ҡ. ҡар.* **шалтырау.**

**ШАЛТЫРМАҠ** *и. диал.* **1.** Көрөҫ сығыры (*ҡар.* **көрөҫ**).

**2.** *ҡар.* **тырпыса**[1].

**ШАЛТЫР-ШОЛТОР, шалтыр ҙа шолтор** *оҡш.* Оҙайлы рәүештә ҡабат-ҡабат шалтыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шалтыр-шолтор итеү. Шалтыр-шолтор килтереү.* ■ *Фатима биҙрәләрен шалтыр-шолтор алды ла, шәп-шәп атлап сығып китте.* Ж. Кейекбаев.

**ШАЛФЕЙ** [*рус.*] *и.* Ирен сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған аҡһыл йәшел төҫтәге киртләс япраҡлы хуш еҫле тау үләне (медицинала ҡулланыла). *Шалфей төнәтмәһе.*

**ШАМ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит. ҡар.* **кис 1.** *Таңымаҫһың күҙең асып собых илә шамды* (Бәйеттән).

**ШАМА** *и.* Бешереп эскәндән һуң ҡалған сәй төпрәһе. *Йырлашыуға китһә эштәр, ҡарт ул яҡҡа самалы, сәй эсәргә тиһәң инде һығып ҡуя шамаһын.* М. Тажи.

**ШАМАИЛ** [*ғәр.*] *и. дини* Рам эсенә яҙып эленгән доға. *Сөннәтсенең күҙе иң элек стеналағы шамаилдәргә, төрлө төҫтәге ҡағыҙҙарҙан эшләнгән мәсет һүрәтенә төштө.* Т. Алюк.

**ШАМА́Н** [*рус.* ⟨ *эвенк.*] *и. ҡар.* **ҡам.**

**ШАМБЫ** *и.* Треска һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған ҡараһыу һыртлы, йомро кәүҙәле балыҡ. *Бик шыма балыҡ бар — шамбы. Башынан тотһаң — ҡойроғо менән ысҡына ул, ҡойроғонан эләктерһәң — башы менән шыуып сыға.* Я. Вәлиев.

**ШАМБЫР** *оҡш.* Ҡапыл һыуға сумғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Сәрбиямал шамбыр итеп тәрән һыуға барып сумды.* З. Биишева.

**ШАМБЫРЛАТЫУ** *ҡ.* Шамбыр иттереү. *Ат сиркәнеп һәм шикләнеп торманы, .. шамбырлатып һыуға инеп тә китте.* С. Ҡудаш.

**ШАМБЫРЛАУ** *ҡ.* Шамбыр итеү. *Ҡапыл күтерлек янында һыу шамбырланы.* Ф. Иҫәнғолов.

**ШАМБЫР-ШОМБОР, шамбыр ҙа шомбор** *окш.* Ҡабат-ҡабат шамбыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шамбыр-шомбор итеү. Шамбыр ҙа шомбор килеү.* ■ *Малайҙар балыҡ ҡаптыра башланы. Султ та султ иттереп һалып торалар, шамбыр ҙа шомбор иттереп алып ҡына торалар.* С. Ҡудаш.

**ШАМО́Т** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. тех.* Юғары температурала үртәлгән утҡа сыҙамлы балсыҡ.

**ШАМПА́НСКИЙ** [*рус.* шампанское] *и.* Углекислый газ менән байыҡтырылған йөҙөм шарабы. *Әллә кемдәр яңы йыл ҡаршылап шампанский асыр.* Р. Солтангәрәев.

**ШАМПИНЬО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Аҡ йәки һорғолт төҫтәге ашай торған пластинкалы бәшмәк.

**ШАМПУ́НЬ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Сәс йыуа торған хуш еҫле шыйыҡ йәки онтаҡ һабын.

**ШАМТЫР** *с.* Өҫ-башын таҙа йөрөтмәгән, бөхтәлек етешмәгән; әрпеш. *Шамтыр ҡатын. Шамтыр булыу.*

**ШАМТЫРАУ** *ҡ.* **1.** Шамтыр булыу. *Шамтырап йөрөү.*

**2.** *диал. ҡар.* **шалпайыу.** *Миһран колаҡтары һалпайған, ирендәре шамтыраған бер егерме биш йәшлек һоро бейәне менгән.* Ш. Шәһәр.

**ШАМТЫРЛАНЫУ** *ҡ.* Шамтырға әйләнеү, шамтыр булыу; әрпешләнеү. *Өҫ-башын ҡарамай, шамтырланып йөрөү.*

**ШАМТЫ-ШОМТО** *с. диал.* Теләһә нindәй, алама, насар (әйбергә, кейемгә ҡарата). *Шамты-шомто кейем кейгән балыҡсылар килә.* М. Тажи.

**ШАН** [*гәр.*] *и.* Ил алдындағы абруй; шөһрәт, дан. *Шан ҡаҙаныу.* ■ *Улар үлгән хәҙер, барыһы бөткән тик тарихта ҡалған шандары.* Д. Юлтый.

**ШАНЛЫ** *с.* Шан ҡаҙанған; шөһрәтле, данлы. *Шанлы ғәскәр. Шанлы ҡала. Шанлы йылдар.* ■ *Ҡыҙыл байраҡ, шанлы байраҡ мең-мең йәшәһен* (Халыҡ йырынан).

**ШАНС** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Берәй эш-хәлдең уңышлы тамамланыуын тәьмин итә торған уңайлы шарт; мөмкинлек.

**ШАНТА́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Билдәле бер маҡсат менән кемгәлер янау, уның дәрәжәһен төшөрә торған факттарҙы йәки мәғлүмәттәрҙе фаш итеү менән ҡурҡытыу. *Шантаж политикаһы.*

**ШАНТАЖСЫ** *и.* Шантаж менән эш итеүсе.

**ШАН-ШӘҮКӘТ** [*гәр.*] *и. йыйн.* Төрлө дан һәм хөрмәт. *[Хәҙрәт:] Бадишаһыбыҙҙың шан-шәүкәтен һаҡлау һәр бер аңлы мосолман бәндәнең бурысы.* Ғ. Хәйри.

**ШАҢ** [1] *и. окш.* Ҡалын тимергә ҡаты нәмә менән һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ.

**ШАҢ** [2] [*рус.* чан] *и.* Тәпән рәүешендәге ҙур ағас һауыт. *Эркет шаңы.* ■ *Бисә шаңдан ҡатыҡ ҡойоп, көтөүсе егеткә бирҙе.* И. Көҫәпҡол.

**ШАҢ** [3] *и. ҡар.* **саң** [3].

**ШАҢҒАҠ** *и. диал.* Шаңдаҡ.

**ШАҢҒЫР** *окш.* Ҡалын ҡалай, нығ кипкән ҡаҡ ағасҡа һуҡҡанда йәки улар бер-береһенә бәрелгәндә сыҡҡан яңғырауыҡлы тауышты белдергән һүҙ. *Шаңғыр итеп ҡалыу.*

**ШАҢҒЫРАТЫУ** *ҡ.* **1.** Шаңғыр иттереү, яңғыратыу. *Шаңғырата һуғыу. Шаңғыратып салғы яныу.*

**2.** Көслө тауыш менән тирә-яҡты яңғыратыу. *Көмөш тәңкәләр сыңлатып, тау шаңғыратып көлә-көлә, таштан-ташҡа ырғый-ырғый аҡ шарлауыҡ ҡайҙа елә.* А. Игебаев. *Йәшен кеүек үтә поездары, шаңғыратып оҙон сағылды.* Й. Гәрәй.

**ШАҢҒЫРАУ** *ҡ.* **1.** Шаңғыр итеү, яңғырау. *Шаңғырап торған ҡаҡ ағас.* ■ *Искәндәр ҡылысты ҡулына алып, алдында торған ҙур тимер түмәргә һелтәне. Тимер түмәр шаңғырап, икегә ярылып ауҙы* (Әкиәттән).

**2.** *ҡар.* **шаңдау** [1] 1. *Гудок тауышына урман шаңғырап китте.*

**3.** Кибеп, ҡороп ҡаҡҡа әйләнеү. *Шаңғырап ятҡан юл.*

**ШАҢҒЫРЛАУ** *ҡ. ҡар.* **шаңғырау.**

**ШАҢҒЫРТЫУ** *ҡ. ҡар.* **шаңғыратыу** 2. *Саҡыра ла кәкүк тирәгемдә, ишек алдарымды шаңғыртып* (Халыҡ йырынан).

**ШАҢҒЫРЫҠ** *и. ҡар.* **шаңдау** [2].

**ШАҢҒЫТЫУ** *ҡ.* **1.** *ҡар.* **шаңҡытыу.** *Ҡапыл ҡолаҡ шаңғытып, ҡыуыш алдында мылтыҡ атылған.* С. Кулибай.

◆ **Балыҡ шаңғытыу** көҙгө йоҡа боҙ аҫтындағы балыҡты һуғып, иҫәңгерәтеп алыу.

**ШАҢҒЫУ** *ҡ. ҡар.* **шаңҡыу.**

**ШАҢДАҠ** *и.* **1.** Байып йәки сығып килгән ҡояш, ай яҡтыһынан ҡыҙарған офоҡ; шәфәҡ. *Иртәнге шаңдаҡ. Киске шаңдаҡ.* ■ *Ике аҡҡош йөҙә ине күлдә таң шаңдағы ҡалҡҡан бер мәлдә.* С. Кулибай. *Ҡая ташта тора буҙарып байып барған айҙың шаңдағы.* М. Тажи.

**2.** Ҡояш, ай әйләнәһендәге яҡты ҡулса. *Ай шаңдағы. Ҡояш шаңдағы.*

**3.** Ут яҡтыһынан төшкән алһыулыҡ, ҡыҙыллыҡ. *Ҡайһы бер кистәрҙә карт геолог алыҫ ауылдарҙа янғындар шаңдағын күрә.* Ә. Бикчәнтәев.

**4.** *күсм. ҡар.* **шауҡым.** *Үлемесле һуғыштың ҡанлы шаңдағы ҡағылмаған берәй мөйөш бармы ни был ҡалала?* З. Биишева.

● *Киске шаңдаҡ ҡыҙарһа, киленем ул тапҡандай, иртәнге шаңдаҡ ҡыҙарһа, илем яуға сапҡандай.* Әйтем.

**ШАҢДАУ** [1] *ҡ.* **1.** Шаң [1] итеп яңғырау, яңғырап кире ҡайтыу; шаңлау (тауышҡа ҡарата). *Яратам! — тип һөрән һалдым яҡын-тирәгә.. Яратам тип, шаңдап ҡайтты йөрәк тауышым.* У. Кинйәбулатов.

**2.** Яңғырап тауышты кире ҡайтарыу, шаңлау (тирә-яҡҡа ҡарата). *Шандап тороу.* ■ *Йылҡылары кешнәп ҡуйһа, тауҙар ҙа шаңдап китә.* С. Әлибаев.

**ШАҢДАУ** [2] *и.* Шаң итеп, яңғырап кире ҡайтҡан тауыш.— *Илгужа!! Беҙгә шаңдау ғына яуап бирә.* Ғ. Ибраһимов. *Дәртле йыр гранит ҡаяларға бәрелеп кире ҡайта. Шаңдау тыуҙыра.* И. Ғиззәтуллин. / Нимәнеңдер эҙе, шауҡымы. *Шаулап үтеп китте йәшлектәрем, атылғандай тауҙан шарлауыҡ. Тороп ҡалды бары шаңдауҙары, хәҙер мин тын: дау ҙа, шау ҙа юҡ.* М. Басыров.

**ШАҢДАУЫҠ** *с. диал.* Шаңдаҡ (1 мәғ.) төҫөндәге, ҡыҙыл. *Шаңдауыҡ таң.*

**ШАҢҠ** *окш.* Ҡаҡ нәмәгә ҡаҡлыҡтыра һуҡ-

ҡанда сыҡҡан өҙөк тауышты белдергән һүҙ. *Шаңҡ итеү. Шаңҡ итеп ҡалыу.*

**ШАҢҠАЙ** *и. диал.* Ҡунысы ҡырҡылған итек башы.

**ШАҢҠАЙЫУ** *к. диал.* Саңҡайыу.

**ШАҢҠЫТЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **шаңҡытыу.** *Мин һаман шаңҡытылған балыҡ һымаҡ өнһөҙ торам.* З. Хисмәтуллин.

**ШАҢҠЫТЫУ** *к.* Ныҡ һуғып йәки көслө тауыш шауҡымы менән шаңғытыу, һиҙеү, тойоу һәләтен юғалттырыу, иҫһеҙләндереү; шаңғытыу. *Шаңҡыта бәреү. Атыу тауышы ҡолаҡты шаңҡытты.*

**ШАҢҠЫУ** *к.* **1.** Шаңҡ итеү, яңғырау. *Салауат балта тауышы шаңҡығас, ҡолаҡ һалып тыңлаған.* М. Буранғолов.

**2.** Бәрелеү, һуғылыуҙан, көслө тауыштан һ. б. һиҙеү, тойоу, һәләтен юғалтыу; шаңғыу, иҫһеҙләнеү. *Баш шаңҡый. Ҡолаҡ шаңҡый.* ■ *Виталий башын һәрмәп ҡараны, әллә ни юҡ һымаҡ. Ахыры снаряд тауышына шаңҡыған ғына.* Н. Мусин.

**3.** Исәңгерәтә һуғыуҙан үлеү (балыҡҡа ҡарата). *Шаңҡыған балыҡтар һыу өҫтөнә сыҡты.*

**4.** *күсм.* Аңлау, уйлау һәләтен юғалтыу; иҫәңгерәү. *Мин һаман да шаңҡып ултырам: ни хәтлем ауырлыҡты күтәрә ала был ҡатын-ҡыҙ тигәнең.* Р. Солтангәрәев. *Кәлиҙең кото алынды. Ул тағы бер минутҡа шаңҡып ҡатып ҡалды.* И. Ғиззәтуллин.

**ШАҢЛАТЫУ** *к.* Көслө тауыш менән тирә-яҡты яңғыратыу; шаңғыратыу. *Таҡыя башлы үләнде ҡырҡып алаһың да, .. урман яңғыратып, тау-таш шаңлатып уйнап ебәрәһең.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 14 июль.

**ШАҢЛАУ** [1] *к. ҡар.* **шаңдау** [1].

**ШАҢЛАУ** [2] *к.* **1.** Ҡолаҡ һалып иғтибар менән тыңлау. *Зәңгәр күктән дәртле моң ҡойола, гүйә кемдер уйнай ҡурайын! Юҡ йомарт ер көмөш шөңгөр итеп, ҡуҡҡә сөйгән һабан турғайын! Шаңлай уны моңһоу умырзая, бәрхәт күлдәктәрен кейенеп..* Р. Ғарипов. *Һәүбән бара торғас, ҡурай тауышы ишеткән, шаңлаған да, т.ул яҡҡа табан ыңлаған.* «Аҡбуҙат».

**2.** Иғтибарға алып ҡуҙәтеү. *Миңлегөл .. тура ҡайтмай Уралға, ҡаҙаҡ илендә туҡтап, тәүҙә илен шаңланы.* М. Буранғолов.

**ШАҢНАУ** *к. диал.* Киҙәнеп яңаҡҡа, сикәгә һуғыу. *Тимербулат асыуынан нишләргә белмәй, иптәшенең сикәһенә берҙе шаңланы.* Р. Низамов.

**ШАП** *оҡш.* Ҡаты нәмәгә йомшаҡ яҫы нәмә менән һуҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шап итеү. Шап итеп төшөү.* ■ *Ҡаты ел көс менән бәреп инде лә, китапты шап иттереп ябып ҡуйҙы.* Р. Назаров. *Закир күңелһеҙ генә түргә уҙҙы. Шинелен, юл тоҡсайын шап иттереп мөйөшкә ырғытты.* З. Биишева.

**ШАПАҠ** *с. һөйл.* Киң булып йәйелгән; ялпаҡ. *Шапаҡ ауыҙ. Шапаҡ бит.*

**ШАПАЛА** *и. диал.* Алғы түрән.

**ШАПАЛАҠ** *и.* Үрмәгән ҡайыш ҡамсы.

**ША́ПКА** [*рус.*] *и. махс.* Газетала бер нисә мәҡәләгә бирелгән дөйөм исем; баш.



**ШАПРАН: ала шапран** *диал.* яҙғы өҙөк, ала ҡар. *Ала шапран ваҡыт. Ала шапранда юлға сығыу.*

**ШАПРЫҠ** *с. диал.* Маҡтансыҡ. *Шапрыҡ кеше.*

**ШАПТЫР** *оҡш.* Ҡапыл һыуға төшкәндә, кү булып ҡапыл һыу түгелгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шаптыр итеү. Шаптыр итеп һыу түгеү.*

**ШАПТЫРЛАТЫУ** *к.* Шаптыр-шоптор иттереү, шаптыр-шоптор килтереү. *Шаптырлатып һыу кисеү.* ■ *Һыу өҫтөндә өйрәк төҫлө шаптырлатып йөҙгән пароход борола башлай.* Ж. Кейекбаев.

**ШАПТЫРЛАУ** *к.* Шаптыр-шоптор итеү, шаптыр-шоптор килеү. *Шаптырлап һыуға төшөү. Шаптырлап түгелеү.* ■ *Тиҙҙән аяҡ аҫтыбыҙҙа һыу шаптырлай башланы, түңгәктәргә абына-йығыла барабыҙ.* Д. Юлтый.

**ШАПТЫР-ШОПТОР, шаптыр ҙа шоптор** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат шаптыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шаптыр-шоптор итеү. Шаптыр-шоптор килеү. Шаптыр-шоптор һыу кисеү.* ■ *Ми шаптыр-шоптор атлап килеп балыҡҡа үрелдем* Н. Мусин.

**ШАПШАҠ** *с. диал.* Әрнеш. *Шапшаҡ ҡатын*

**ШАП-ШАҠТАЙ** *р.* Һаулығы яҡшы; мыҡты шәп. *Шап-шаҡтай йөрөп ятыу.* ■ *Һикһәнд уҙып киткән кеше бит инде [Александр Петрович] .. һаман бирешергә йыйынмай әле. Үҙе шап-шаҡтай һиҙә.* Д. Исламов.

**ШАП-ШАҠЫР** *и.* Малайҙар уйыны (билдә бөгөлөп, бер-бер артлы теҙелеп баҫалар; и арттағы малай берәм-берәм улар аша һикере сыға ла, алға тора; иң артта ҡалғаны дауам итә); алаҡ-шаҡалай.

**ШАП-ШОП, шап та шоп** *оҡш.* Ҡабат-ҡаба шап иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шап-шо итеү. Шап та шоп килеү.* ■ *Кәмән менә Сәмән .. ҡыҫҡа күкрәкле арбаға ярышып ултырып, үгеҙҙең ҡабырғаһына шап-шоп һуғып, ур манға китеп барҙы, ти* (Әкиәттән).

**ШАПЫЙ** *с. диал.* Һүҙ, сер тотмаған. *Шапы кеше.*

**ШАПЫҠ** *с. диал. ҡар.* **шағыр** [1] 2. *Шапыҡ кү*

**ШАПЫЛДАТЫУ** *к.* Шап иттереү, шап-шо килтереү. *Ирәнде шапылдатыу. Шапылдаты һуғыу.* ■ *[Насип] ишекте шапылдатып ябы йүгерә-атлай баҫҡыстан төшөп китте.* И. Абдуллин. *Ел тәҙрә ҡапҡасын ҡуптарып алып таш ларға теләгәндәй, шапылдата ла шапылдат* Ә. Вәли.

**ШАПЫЛДАУ** *к.* Шап итеү, шап-шоп килеү *Шапылдап тороу.* ■ *Ҡунаҡтар артынан ише шапылдап ябылды.* Я. Вәлиев. *Заятүләк .. Асылыҡүл һыуының шапылдап тулҡынланғаны ишетә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ШАПЫЛДАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **шапылдау.**

**ШАПЫМ** *с. диал.* Юҡты бар итеп һөйләрг яратҡан.

**ШАПЫРАН** *с. диал.* Шапырынырға яратҡа маҡтансыҡ. *Шапыран кеше.*

**ШАПЫРЛАТЫУ** *к.* Шапыр-шопор иттереү шапыр-шопор килтереү. *Шапырлатып һыу тү геү. Шапырлатып кисеү.*

**ШАПЫРЛАУ** *к.* Шапыр-шопор итеү, шапыр-шопор килеү. *Шапырлап һыу кисеү.* ■ *Фәхри итектәрен, кәпәсен һалып ырғытты ла һыуға шапырлап төшөп ук китте.* Б. Бикбай.

**ШАПЫРТМА** *с.* Шапыртырға, арттырып һөйләргә яраткан. *Шапыртма кеше.*

**ШАПЫРТЫНЫУ** *к. диал.* Шапырыныу.

**ШАПЫРТЫУ** *к.* Ысын булғандан арттырыу; ҡабартыу. *Шапыртып һөйләү.* ■ *Борсаҡ шыттыра йәки шапырта тип уйламағыҙ. Юҡ, юҡ. Ҡәһәриә ханым һис шикһеҙ сибәр ҡатын.* С. Кулибай. *Табындарҙа тостар әйтеүсенең шапыртырға бер аҙ хаҡы бар.* Н. Нәжми.

**ШАПЫР-ШОПОР, шапыр ҙа шопор** *окш.* Ҡабат-ҡабат шапыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шапыр-шопор итеү. Шапыр ҙа шопор килеү. Шапыр-шопор һыуға төшөп китеү.*

**ШАПЫРЫҠ** *с.* Шапыртып, ҡабартып һөйләнгән. *Шапырыҡ һүҙ.*

**ШАПЫРЫЛЫУ** *к.* Ташып ниндәйҙер кимәлдән ашыу. *Ҡамыр шапырыла. Шапырылып түгелеү.* ■ *Һыу шапырыла. Гүйә әзмәүер ҡыҙ тар баҫмаға баҫып кер сайҡай.* Х. Ғиләжев.

**ШАПЫРЫНҠЫ** *с.* Ҙур итеп күрһәтелгән, арттырылған, ҡабартылған. *Шапырынҡы һүҙ. Шапырынҡы йөкләмә.*

**ШАПЫРЫНЫУ** *к.* Үҙ-үҙеңде шәп итеп күрһәтеү; маҡтаныу. *Шапырынып йөрөү. Шапырынып һөйләү.* ■ *[Зөлхәбирә — Ғиззәтуллаға:] Магазин директоры итеп урләтәләр, тип, шапырынып йөрөгәйнең бит. Харап, урләттеләр.* М. Тажи. *[Юламан:] Мин ике ҡулымда ике гер уйнатам .. тип бер аҙ шапырынып та өлгөрҙө.* Х. Кәрим.

**ШАПЫРЫУ** *к.* Күбекләнеп ҡабарған шыйыҡ нәмәне һоҡа-һоҡа кире ҡойоп болғатыу; һапырыу. *Һөтөө шапырыу. Ашты шапырыу.* ■ *Эрәнйәнкәй теуҙың ай башында шапырыпҡай ҡымыҙ эсәләр* (Халыҡ йырынан).

**ШАР** [1] [*рус.*] *и.* **1.** Түңәрәктең уҙ диаметры тирәһендә әйләнеүенән барлыҡҡа килгән геометрик есем. *Шар радиусы. Шар йөҙө. Шар майҙаны.*

**2.** Шул есем рәүешендәге нәмә. *Бильярд шары.* ■ *[Батша:] Шар ырғытам, шул кемдең башына төшә — ҡыҙым шуға була* (Әкиәттән).

◆ **Ер шары** Ер планетаһы. **Күҙ шар (йәки шарҙай) булыу** *кар.* **күҙ. Һауа шары** 1) сферик аэростат; 2) һауа тултырылған шар рәүешендәге балалар уйынсығы. **Шар күҙ** тупайып, алға сығып торған күҙ. **Шар һуғыу** егеттәр, ир балалар уйыны (уйнаусылар һуғыусы һәм көтөүселәргә бүленә; көтөүселәрҙең береһе шарҙы юғары ырғыта, һуғыусыларҙан берәү таяҡ менән уны һуғырға тейеш. Уйындың отошо ошо уйын ҡоралдарының билдәләнгән урынға килтереп еткерелеүенә бәйле).

**ШАР** [2] *и.* Әрәмә баҫҡан түмгәкле һаҙлыҡ урын. *Шар бесәне. Шарлы урман.*

**ШАР** [3] *р.* **1.** Бик ныҡ киреп (асыу, асылыуға ҡарата). *Тәҙрәне шар асыу. Шар асыҡ ишек. Шар асылған ҡапҡа.* ■ *[Иштуған] арата ҡапҡаны шар асып ҡуйҙы.* З. Биишева. *Ғиндуштың күҙҙәре .. шар асылған, шаулатып йыш-йыш тын ала.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *һөйл.* Салт, бик (көндөң асыҡлығына ҡарата). *Шар аяҙ төн.* ■ *Кистән генә болот, хатта ямғыр ҙа яуып тора ине, ә бөгөн шар аяҙ.* Н. Ҡәрип.

**ШАР** [4] *окш.* Әсергәнеп, ҡурҡып ҡысҡырған көслө тауышты белдергән һүҙ; сар. *Шар итеп ҡысҡырыу. Шар итеп ҡалыу.*

**ШАРАИТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит. кар.* **шарт** [1]. *Тарихи шараиттар.*

**ШАРАҠ** [1] *с.* **1.** Төҙ, ботаҡһыҙ, шыма. *Шараҡ ҡарағай. Шараҡ ағаслы урман.* ■ *Ботаҡҡа ботаҡ тереп тиерлек үҫкән ҡарағайҙарға, шараҡ шыршыларға .. ҡараһаң бүркең төшөр.* Т. Килмөхәмәтов. *[Төлкөсура:] Бына бынау уҫаҡтар күрәклек кенә бит! Үҙҙәре таҙа, үҙҙәре шараҡ.* Н. Мусин./ Еңел, тиҙ ярылыусан. *Шараҡ утын.* ■ *Имән утын шараҡ була ул, шартлап ярылып тора.* Н. Мусин. *Таш ярғысланып торған шараҡ таш булып сыҡты, ел-ямғырға сыҙамаңы.* Ә. Вахитов.

**2.** *диал.* Ярылған, ҡытыршы. *[Мөзәйәнә еңгәнең] ҡарайып ҡатҡан ҙур шараҡ бармаҡтары .. ҡағыҙҙы бөгәрләнеләр.* Ә. Вахитов.

**3.** Ныҡлы булмаған, тиҙ бирешеүсән. *Шараҡ ат. Шараҡ мал.*

**ШАРАҠ** [2] *с. һөйл.* Һөрөлмәй, сәселмәй йәки сабылмай ҡалған. *Шараҡ ер. // Шараҡ ҡалдырып һөрөү.*

**ШАРАҠЛАУ** *к.* Шәп итеп, һыҙыра ҡойоу (ямғырға ҡарата). *Тауҙар артынан ямғыр килеп сыҡты ла шараҡлап яуа башланы.* М. Хәйҙәров.

**ШАРАН** *и.* **1.** Йылғаның шәп аҡҡан урыны; шаршы.

**2.** Мурҙа һалыу өсөн шаршыға талдан үреп ҡуйған тәпәшәк ситән. *Шаран ағасы.* ■ *Бында ҡаҙыҡ ҡағып, мурҙа һалыу өсөн йылғаны шаран менән быуып ҡуйғандар.* Р. Солтангәрәев.

**3.** Мурҙа ҡанаты.

**ШАРАН-ЯРА** *р. кар.* **шарран-яра.**

**ШАРАП** [*ғәр.*] *и.* Йөҙөм һутынан әсетелгән йомшаҡ иҫерткес эсемлек; хәмер. *Беҙ кутәреп шарап эстек: минең тыуған көн бөгөн.* М. Кәрим.

**ШАРҒАТ** *с. диал. кар.* **шараҡ** [1] 1. *Шарғат утын.*

**ШАРҘАУАЙ** *с. диал.* Шарҙыуан.

**ШАРҘЫУАН** *с.* **1.** Үҙен иркен тотҡан, ҡысҡырып көлөргә, һөйләшергә яратҡан; шаян. *Шарҙыуан кеше.* ■ *Ғәлейәндең уле хәбәре килгәс, шарҙыуан холоҡло һылыу Өркиә ҡапыл баҫалҡыланды.* Н. Мусин.

**2.** Сер йәшерә белмәгән, бер ҡатлы. *Рафиҡ гүмере шарҙыуан, асыҡ-ярыҡ булды.* Ә. Вахитов.

**ШАРЖ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Кеше йәки бер нәмәнең тышҡы оҡшашлығын һаҡлау менән бергә үҙенсәлекле һыҙаттарын көлкөгә һабыштырып һүрәтләү алымы. *Шарж башлыса һүрәт сәнғәтендә ҡулланыла.* К. Әхмәтйәнов.

**2.** Шул алым менән төшөрөлгән һүрәт. *Шарж төшөрөү.* ■ *[Фәриҙә:] Ә-ә, бына ни өсөн күңелең кителгән икән! «Бәләкәй һәнәк» тәге һүрәтте әйтәһең инде, ә? Дуҫтарса шарж ғына бит ул, Фәрит.* Ғ. Әхмәтшин.

**3.** Шул алым менән яҙылған ҡыҫҡа шиғыр. *Әҙәби шарж.*

**ШАРИК** [*рус.*] *и.* Бәләкәй генә, ваҡ шар[1] (2 мәғ.).

**ШАРИКЛЫ** *с.* Ваҡ шарҙар, шариктар ҡуйылған; шариктар ярҙамында хәрәкәт иткән. *Шариклы подшипник.*

**ШАРИКОПОДШИПНИК** [*рус.*] *и.* Шариктар ҡуйылған, шариклы подшипник.

**ШАРҠАНА** *с. диал.* Ҡылансыҡ. *Шарҡана ҡыҙыҡай.*

**ШАРҠ-ШОРҠ** *оҡш.* Ҡаты итеп көлгән тауышты белдергән һүҙ. *Шарҡ-шорҡ көлөү.*

**ШАРҠЫЛДАҠ** *с.* Ҡысҡырып көлгән, көлөргә яратҡан; көләкәс. *Шарҡылдаҡ ҡыҙ.*

♦ **Шарҡылдаҡ баш** *бот.* эсе ҡыуыш йомро аҡ сәскәле бейек үлән (сәскәһен балалар маңлайға шартлатып уйнай).

**ШАРҠЫЛДАУ** *ҡ.* Ҡысҡырып көлөү, шарҡ-шорҡ килеү. *Гөлниса тағы шарҡылдап көлөргә тотонды.* З. Хисмәтуллин.

**ШАРҠЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **шарҡылдау.**

**ШАРҠЫРАУ** *ҡ. диал.* Шарлау, урғылыу. *Шарҡырап ағыу. Шарҡырап ҡайнау.*

**ШАРҠЫРАУЫҠ** *и. диал.* Шарлауыҡ.

**ШАРЛАМА** *и.* **1.** *ҡар.* **шарлауыҡ.** *Шаулы шарлама.* ■ *Шарлама «Йотам һеҙҙе»,— тигән кеүек үкереп ята ине.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** *ҡар.* **шаршы.**

**ШАРЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Шар һымаҡ түп-түңәрәк итеү (күҙҙе). *Носрат ағай ауыҙын ҙур асып, быяла күҙҙәрен шарландырып, хахылдап көлдө.* Й. Солтанов.

**ШАРЛАНЫУ** *ҡ.* Шар һымаҡ түп-түңәрәк булыу (күҙгә ҡарата). *Уның күҙҙәре бесәй күҙе кеүек шарланды.* С. Агиш.

**ШАРЛАТАН** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Үҙен ғилемле, булдыҡлы күрһәтергә тырышҡан наҙан, елғыуар кеше; алдаҡсы. *Шарлатанға ышанып йөрөү. Шарлатан булыу.* // *Шарлатан кеше.*

**ШАРЛАТЫУ** *ҡ.* Ныҡ шаулатыу, тауышландырып ҡойоу, ағыҙыу. *Һыуҙы шарлатып ағыҙыу.*

**ШАРЛАУ** *ҡ.* Ныҡ шаулау, туҡтауһыҙ тауышланып ағыу, ҡойолоу. *Шарлап аҡҡан һыу.* ■ *Тирә-яҡта бейек-бейек тауҙар, ап-аҡ ҡаялар, шарлап ағып ятҡан тау йылғалары.* Р. Бикбаев.

**ШАРЛАУЫҠ** *и.* **1.** Текә ҡаянан, һикәлтәнән киҫә ағып төшкән һыу. *Тау шарлауығы.* ■ *Ҡая таштан, көмөш шикелле ялтырап, шарлауыҡ ағып төшә.* М. Басыров. *Йылғалар тау-таш араһынан шарлауыҡтар яһап төшә, гөрөлтөләре әллә ҡайҙан ишетелә.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Йылғаның шәп аҡҡан урыны; шаршы. *..Шарлауыҡта ҡырсын таштарға морон терәп, комтөрткөстәр, бәрҙеләр ял итә.* З. Биишева.

**3.** *диал.* Гөрөн. *Көслө ямғырҙан шарлауыҡтар хасил булды.*

**ШАРЛЫҠ** *и.* Әрәмәле, түмгәкле һаҙмат урын; шар[2]. *[Сәләй] хөкөмдән ҡасып йөрөргә мәжбүр булып бер шарлыҡта йәшенеп ятҡан.* Р. Шәкүров.

**ШАРМАНКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Яурынға аҫып йөрөтмәле, тотҡаһын өйөрөлтөп көй сығарған ҡумта рәүешендәге баҫмаҡһыҙ механик музыка ҡоралы.

**ШАР-МАР, шар ҙа мар** *оҡш.* **1.** Ғауғалап ҡысҡырған тауышты белдергән һүҙ. *Шар-мар килеү.*

**2.** *с. мәғ.* Уй-хисен йәшерә белмәгән, бер ҡатлы. *Шар-мар кеше.*

● *Шар-мар кеше һүҙ күтәрә, аҫтыртын ҡул күтәрә.* Мәҡәл.

**ШАРОВКА** [*рус.*] *и. а. х.* Рәт араларын йомшартыу эше. *Шаровка үткәреү.* ■ *Ғәҙәттә беренсе шаровканы .. ҡалып килгән сүп үләндәре бөтһөн һәм тупраҡтың өҫкө ҡатламы ҡатып китмәһен өсөн эшләйҙәр.* Р. Ханнанов.

**ШАРОВКАЛАУ** *ҡ. а. х.* Шаровка үткәреү. *Сөгөлдөр баҫыуҙарын шаровкалау.* ■ *Үҫемлектәр шытып сығып күҙгә күренгәс тә шаровкалау, унан букетлау башланды.* Т. Килмөхәмәтов.

**ШАРП-ШОРП, шарп та шорп** *оҡш. һөйл.* Һыуланып, бысранып атлағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шарп-шорп итеү. Шарп-шорп килеү.*

**ШАРПЫЛДАУ** *ҡ. һөйл.* Шарп-шорп итеү, шарп-шорп килеү.

**ШАРРАН-ЯРА** *р.* **1.** Тулыһынса киреп, шар. *Шарран-яра асыҡ.* ■ *Келәттәрҙең ишектәре кипһен өсөн ишектәрҙе, тәҙрәләрҙе шарран-яра асып ҡуйҙылар.* С. Агиш.

**2.** Тотош, тулыһынса, бөтөнләй. *Бына бер нисә йыл инде ул [келәт] шарран-яра буш тора.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** *ҡусм.* Йәшермәй, асыҡтан-асыҡ. *Шарран-яра әйтеү.* ■ *Бер урмансы Баһауҙы иҫкәртә: — Ниңә, Баһау, шарран-яра һөйләйһең шул хәтле? Берәй шымсы өҫтөңдән яҙып бирер ҙәбаһа.* Я. Вәлиев.

**ШАРТ**[1] [*ғәр.*] *и.* **1.** Ниҙелер башҡарыуҙан алда тормошҡа атҡарылырға тейешле талап. *Шарт ҡуйыу. Шартты үтәү. Шартты боҙоу.* ■ *«Миңә кейәү булырға теләгән кеше көрәштә еңеп сығырға тейеш. Икенсе шартым шул»,— ти батша* (Әкиәттән).

**2.** Үҙ-ара һөйләшеү буйынса үтәлергә тейешле хәл, талап. *Түбәндәге шарттарға күнешеп, ошо договорҙы төҙҙөк.* Т. Хәйбуллин.

**3.** Ниҙеңдер үтәлеүен, бойомға ашыуын тәьмин иткән, уның өсөн мотлаҡ булған хәл. *Тейешле шарттар.* ■ *Алыр булһаң бер остан ғилем донъя, уның да шартылыр — тәүфиҡ, бик аңла.* М. Өмөтбаев. *Беҙ поездың береһен дә һайлап тормайбыҙ,.. беҙгә эләгеү генә шарт.* Д. Юлтый.

**4.** Ниҙеңдер булмышын, тормошон билдәләгән хәл. *Тарихи шарт. Ауыр шарт. Тәбиғи шарт. Ҡышҡы шарт. Больница шарттары. Тормош шарты. Эш шарты.* ■ *Яңы тормош шарттары, яңы социаль мөнәсәбәттәр яңы мәҡәләләрҙе тыуҙыра.* Ғ. Амантай.

**5.** Ниҙеңдер нигеҙен билдәләгән мәғлүмәт. *Мәсьәләнең шарты. Теореманың шарты.*

♦ **Иман шарты** ислам диненең асылы яҙылған китап. **Шартына килтереү** талапҡа тейешле, тәртипкә ярашлы итеү; еренә еткереү. *Шартына килтереп биҙәү. Шартына килтереп кейенеү.* ■ *Ул [Саяф] мөмкин тиклем шартына килтереп атларға теләне.* С. Агиш. **Шарт хәле** *лингв.* Һөйләмдә ҡылымдан аңлашылған эш-хәрәкәттең ниндәй шарттарҙа башҡарылыуын белдергән

эйәрсән киҫәк. **Шарт һөйкәлеш** эш-хәрәкәттең үтәлеүе өсөн икенсеһенең үтәлеүсе шарт булғанды белдергән һөйкәлеш формаһы. **Шарт һөйләм** *грам.* баш һөйләмдән аңлашылған эш-хәрәкәттең башҡарылыуы өсөн шарт булған икенсе эш-хәрәкәтте белдергән эйәрсән һөйләм.

● *Тейеүе шарт түгел, шартлауы шарт.* Мәҡәл.

**ШАРТ** [2] *окш.* Ҡаты нәмә ныҡ һуғылғанда, һынғанда йәки мылтыҡ атҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шарт итеп һыныу. Ишекте шарт ябыу.* ■ *[Хаммат] атына шарт һуғып, туғай эсенә боролоп инеп китте.* З. Биишева.

**ШАРТЛАМА** *и. диал.* Ер еләге.

**ШАРТЛАТҠЫС** [1] *и.* Шартлау өсөн ҡулланылған нәмә (динамит, тол һ. б.). *Йылға төбөн шартлатҡыс ярҙамында тәрәнәйтеү.*

**ШАРТЛАТҠЫС** [2] *и. диал.* Балыҡ ҡыуығы.

**ШАРТЛАТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **шартлатыу.** *Артта күпер шартлатылмаған бит, сигенергә юл бар бит әле.* Н. Нәжми.

**ШАРТЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** Шарт [2] иттереү, шарт-шорт килтереү. *Сыбыртҡы шартлатыу. Ишекте шартлата ябыу. Мылтыҡ шартлатыу.* ■ *Һалдат килеп, тегенең муйынындағы төймәне шартлатып өҙөп ала ла кеҫәһенә һалып ҡуя* (Әкиәттән).

**2.** Шартлатҡыс [1] ярҙамында емереп күккә осороу, ҡыйратыу. *Күперҙе шартлатыу.*

**3.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында ҡушма ҡылымдың беренсе компоненты булып төп мәғәнәне көсәйтә. *Шартлатып уҡыу. Шартлатып һөйләү.* ■ *[Хәбибә:] Ҡыҙым колхозда шартлатып эшләп йөрөй.* Б. Бикбай. **Шартлата баҫыу** ныҡ итеп өҙә баҫыу. *Шартлата баҫып сығып китеү.* ■ *Хәлимә ярһыуы баҫылғанса, үсе ҡанғанса әйтте лә, .. шартлата баҫып баҫҡыстан менеп китте.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Бармаҡ шартлатыу** бармаҡтарҙы бер-береһенә сирттереп сыртлатыу. **Тел шартлатыу** телде ырғаҡҡа ҡағып сатылдатыу.

**ШАРТЛАУ** *ҡ.* **1.** Шарт [2] итеү. *Шартлап һыныу. Шартлаған тауыш.*

**2.** Эске емергес көс менән сайрап ярылыу (снаряд, мина һ. б. ҡарата). *Динамит шартланы. Бомба шартланы.* ■ *Ҡайнап торған көрәш, туптар шартлап, уттар уйнап торған.* Ғ. Амантай. *Бер-бер артлы биш-алты бомба шартланы.* Д. Юлтый. / Емергес көстән ҡыйралып, тар-мар килеү, юҡҡа сығыу. *Пар ҡаҙаны шартлаған.*

**3.** Ҡапыл сатнап йәки бүҫелеп ярылыу; тышҡы көбө ярылыу, йыртылыу. *Йәш бөрөләр шартлап япраҡ була һәм кәкүккә яңы моң ҡайта.* М. Кәрим. *Юлда килгәндә бик ҡаты һелкенеүҙән уның һуҡыр эсәге шартлаған.* Ф. Иҫәнғолов. / Тышҡы тәьҫирҙән ярсылыу, сатнау. *Һыуыҡтан шартлау. Эҫенән шартлау.*

**4.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында килеп, етеҙ, шәп, тигән мәғәнәне бирә. *[Бай] тыштан шартлап килеп ингән Шәһәрбаныуға ҡысҡырып ебәрҙе.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Тейеүенән шартлауы яман** файҙаһы йәки зыянынан шау-шыуы, тауышы ҙур булған нәмәгә ҡарата әйтелә. **Шартлап торған** бик ныҡ, көслө, ҡаты (һыуыҡҡа ҡарата). *Ыжғыр буранлы, шартлап торған селләле ҡыш килде.* Ф. Иҫәнғолов.

**Шартларҙай булыу** *йәки* **шартлар сиккә етеү** ниндәйҙер кисерештең һуңғы сигенә етеү. *Хажисолтан асыуынан шартлар сиккә етеп, тышҡа сыҡты.* Я. Хамматов.

**ШАРТЛАУЛЫ: шартлаулы тартынҡылар** *лингв.* һөйләү ағзаларының ныҡ ҡыҫылғандан һуң ҡапыл асылып китеүенән яһалған өндәр (б, п, ҡ, к, т, д).

**ШАРТЛЫ** *с.* **1.** Шарты алдан билдәләнгән. *Шартлы вклад индергәндә вкладчик уны алыу өсөн билдәле бер шарт ҡуя.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 23 ғинуар.

**2.** Мәғәнәһе үҙ-ара һөйләшеп билдәләнгән. *Шартлы билдә. Шартлы сигнал.* ■ *[Яҡуп] был атыуҙарҙың кемдәргәлер бирелгән шартлы билге икәнлеген белә ине.* Б. Бикбай.

♦ **Шартлы рефлекс** *ҡар.* **рефлекс** 1. **Шартлы сифат** *лингв.* нәмәнең урынын, ваҡытын, шулай уҡ ниндәй материалдан яһалғанын белдергән сифат (мәҫ. ҡалалағы һеңлем, ҡышҡы күренеш, алтын сәғәт).

**ШАРТЛЫСА** *р.* Шартлы рәүештә. *Шартлыса килешеү.*

**ШАРТ-ШОРТ, шарт та шорт** *окш.* Ҡабат-ҡабат шарт иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шарт-шорт атыу. Шарт-шорт һуғыу.*

**ШАРТЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Шарт-шорт иттереү; шарт-шорт килтереү. *Таңдыса балтырғандың япрағын, сығып ҡына килгән көпшәһен шартылдата сәйнәп, тамаҡ ялғап ала.* «Ҡуңыр боға».

**ШАРТЫЛДАУ** *ҡ.* Шарт-шорт итеү; шарт-шорт килеү. *Шартылдап тороу. Шартылдап һыныу.*

**ШАРФ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Муйынға урай, башҡа ябына йәки ҡулбашҡа һала торған кейем-һалым әйбере. *Дебет шарф. Ебәк шарф. Йөн шарф.* ■ *Креслола .. муйынын ҡалын шарф менән ураған бер ҡарт серем итеп ултыра ине.* С. Агиш.

**ШАРШАМБЫ** [*фарс.*] *и.* Аҙнаның өсөнсө көнө. *Һайлау йыйылышы шаршамбы көнгә тәғәйенләнгән.* Һ. Дәүләтшина.

**ШАРШАУ** *и.* **1.** Ниҙелер ышыҡлап, һуҙып элә торған ҡорма. *Бишек шаршауы. Карауат шаршауы. Биш иңле шаршау. Күтәреп һуғылған шаршау. Шаршау бауы. Шаршау арты.* ■ *Ишек төбөндә — тимер карауат, ул шаршау менән әйләндерелгән.* Д. Юлтый. **Өрлөк шаршауы** өрлөк буйына матурлыҡ өсөн элгән тар шаршау. / Зал менән сәхнә араһына эленгән ҡорма. *Шаршау асылыу. Шаршауҙы күтәреү.*

**2.** Күҙ алдын томалаған нәмә (ҡараңғылыҡ, туҙан, төтөн һ. б. ҡарата). *Ауылды төн шаршауыябып, кеше аяғы һил булғас, Мостафаларҙың баҡса артына әйәрле ат килтерелгән.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** *театр* Сәхнә эҫәренең айырым бер бүлеге. *Ике шаршаулы спектакль. Балеттың икенсе шаршауы.*

**4.** *күсм.* Тормошто ҡараңғы, ауыр иткән нәмә. *Яҡты ҡояш нурын ҡаплап торҙо батшалыҡтың ҡара шаршауы.* Б. Моҡамай.

♦ **Йөрәк шаршауы** *ҡар.* **йөрәк** 1. **Күкрәк шаршауы** *ҡар.* **күкрәк.**

**ШАР-ШОР** *окш.* Сарылдап ҡысҡырған әсе тауышты белдергән һүҙ; сар-сор. *Шар-шор килеү. Шар-шор итеү.*

**ШАРШЫ** *и.* Йылғаның шәп аҡҡан ере; шаран. *Алдараҡ барған Илгужа миңә табан әйләнеп: — Абайлабыраҡ барығыҙ! Яман шаршы был ..— тип ҡысҡырҙы. Ысынлап та көслө ағын Илгужаны .. алды ла китте.* Ғ. Ибраһимов. *[Ҡыҙыл йылғаһы] йор, шаршыһында ал мунсаҡтай йылҡылдай йәйгор.* Ә. Әхмәтҡужин.

**ШАРШЫЛАНЫУ** *ҡ.* Шаршы рәүешендә булыу, шаршылау. *[Олим] сабыр, тыныс аға, Урал йылғалары һымаҡ шаршыланып, йырлап ятмай.* Ш. Насыров. *Йылға шаршыланып, каяның итәк осона бәрелә лә, төньяҡҡа табаныраҡ боролоп ағып китә.* Н. Мусин.

**ШАРШЫЛАУ** *ҡ.* Шаршы рәүешендә булыу, шаршыланыу. *Шаршылап ағыу.*

**ШАРШЫУ** *ҡ.* Балыҡты ҡурҡытып ауға, йылымға табан ҡыуыу.

**ШАРЫЛДАҠ** *с. һөйл.* Шар-шор килеп һөйләшкән; сарылдаҡ. *Шарылдаҡ кеше.*

**ШАРЫЛДАУ** *ҡ.* Шар-шор килеп ҡысҡырыу, ҡысҡырып һөйләшеү, көләү һ. б.; сарылдау. *Шарылдығы сығыу.* ■ *Сәғәт ярым, ике сәғәт үткәс, бер үҙе биштәй шарылдап көлөп Рәйсә ҡайтып килде.* Ф. Иҫәнғолов.

**ШАРЫЛТЫ** *и. диал. ҡар.* **шәре** 2. *Сәрмәсәнкәй буйы сүгермәк, сүгермәкәй һайын шарылты* (Халыҡ йырынан).

**ШАССИ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Төрлө машина һәм ҡоролманың рамы йәки нигеҙе. *Автомобиль шассийы. Радиоалғыс шассийы.*

**2.** Самолёттың осоп киткәндә йәки төшкәндә ерҙән барыу өсөн хеҙмәт иткән өлөшө (тәгәрмәс ҡуйылған йәки сана табаны рәүешендәге рам).

**ШАТ** [*фарс.*] *с.* Ҡыуаныс, шатлыҡ кисергән. *Шат кеше. Шат булыу. // Шат йәшәү.* ■ *Ул [Тимер] үҙе шат булған кеүек, кешеләрҙе лә шат, матур тормошло итергә теләй.* Б. Бикбай. / Яҡшы кәйефте, ҡыуанысты сағылдырған. *Шат йөҙ. Шат күҙ. // Шат йылмайыу.* ■ *Кешеләрҙең шат, өмөтлө, моңһоу күҙҙәренә ҡарап барамын.* М. Кәрим.

**ШАТАЛАҠ** *с.* Уйнарға, шаярырға әүәҫ; уйынсыл, шаян. *Шаталаҡ ҡыҙыҡай. Шаталаҡ булыу.*

● *Шаталаҡ шаулар, аҫтыртын көлөр.* Әйтем.

**ШАТАЛАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Һәр нәмәне уйын-көлкөгә бороп шаярыу, шаталаҡлыҡ күрһәтеү. *Шаталаҡланып йөрөү.*

**ШАТАЛАҠЛЫҠ** *и.* Уйын-көлкөгә әүәҫлек; шаянлыҡ. *Элекке шаянлыҡ, шаталаҡлыҡ бөтөнләй юғалған, уға [Хәннәнгә] ололар киәфәте кергән.* Л. Ғәлимов. *Бикмөхәмәтов үҙенең шаталаҡлығы, бер ҡатлығы өсөн үкенә-үкенә урынына ултырҙы ла башын түбән эйҙе.* Н. Мусин.

**ШАТАНА** *и. диал. ҡар.* **һандыҡ** [2].

**ШАТЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Шатлыҡ, ҡыуаныс хисе тыуҙырыу; ҡыуандырыу. *[Батша:] Алты батырҙың күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән эштәре мине бик шатландырҙы* (Әкиәттән).

**ШАТЛАНЫУ** *ҡ.* Шатлыҡ кисереү, шат булыу. *Шатланып ҡуйыу.* ■ *Шатланһын халҡым, йәшәрһен ҡырҙар, шаулаһын тормош, яңғыраһын йырҙар.* М. Хәй. *Килтәй үҙе көслө, үҙе мәргән егет булып үҫкән. Атаһы быға бик шатланған* (Әкиәттән).

**ШАТЛАНЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **шатланыу.** *Ғатаулла менән Мәрхәбә шатланышып, .. килен ошо [Гөлсөм] булырға тейеш, тигән мәғәнә менән ымлашып алдылар.* Ғ. Әмири.

**ШАТЛЫҠ** *и.* Йәнгә кинәнес, рәхәтлек, күңелгә күтәренке рух биргән тойғо; ҡыуаныс. *Ҙур шатлыҡ. Шатлыҡ кисереү.* ■ *Шатлыҡ менән хәсрәт — ике көндәш, бер-беренән йылғыр, көслөрәк, бере — ләззәт, бере — ут, көйҙөрә, икәүһенә миндә бер йөрәк.* С. Кулибай. *Күңелемә тауҙай шатлыҡ ҡайтты, тауҙай ҡайғы менән ҡушылып.* Р. Бикбаев. **Шатлығы башынан ашҡан йәки шатлығы эсенә һыймай** ныҡ шатланған кешегә ҡарата әйтелә.

● *Бала шатлығы — әсә шатлығы.* Әйтем. *Бер ҡунаҡ — шатлыҡ, ике ҡунаҡ — артыҡ, өс ҡунаҡ — йөк.* Әйтем. *Әүәлгенең шатлығы ахырғының михнәте, әүәлгенең михнәте — ахырғының шатлығы.* Әйтем. *Шатлыҡ күрһәң, шашма; ҡаза күрһән, аҙашма.* Әйтем.

**ШАТЛЫҠЛЫ** *с.* Шатлыҡ килтергән, кинәнес биргән; ҡыуаныслы. *Шатлыҡлы хәбәр.* ■ *Аҡбулаттың бригадаһы уйын-көлкөлө, шатлыҡлы эшкә йырлаша-йырлаша керешеп китте.* Ғ. Дәүләтшин. / Шатлыҡ кисергән, бәхетле. *Шатлыҡлы минуттар.*

**ШАТРАНЫЖ** [*фарс.* ⟨ *һинд.*] *и. иҫк.* Шахмат, сатраш.

**ШАТРАШ** *и. ҡар.* **сатраш** [2].

**ШАТУН** [*рус.*] *и.* **1.** Машина, механизмдарҙа двигатель валын поршен менән тоташтырған ҡулайлама; терһәк. *Ергә салкан ятып [Фәсхи] терһәк кеүек тырпайып торған дүрт шатунды берәм-берәм тотҡолап, һелкетеп ҡараны.* Й. Солтанов.

**2.** Өҙөнә ятмай ҡышын боларып йөрөгән айыу. / *күсм.* Тилереп ауырыған йылҡы малына ҡарата әйтелә. *Шатун булыу.*

**ШАТЫР** *окш.* Ҡаты нәмәне һындырғанда, бешә нәмәне йыртҡанда, һүткәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шатыр итеү.* ■ *Шахтаны ныгытҡан ағастар ҡапыл шатыр итеп һынып китеп, Кусәрбайҙың өҫтөнә һандыҡтай таш емерелеп төштө.* Т. Хәйбуллин.

**ШАТЫРЛАҠ** *и.* Ҡарауылсыларҙың шатыр-шотор иттереп тырылдата торған ҡоралы.

**ШАТЫРЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** Шатыр-шотор иттереү, шатыр-шотор килтереү. *Кем йыһанды тетрәтте шатырлатып сынйырҙарын.* Ш. Бабич. *Тиҫтәләгән мылтыҡ төн тынлығын шатырлатып ярып ебәрҙе.* Б. Хәсән.

**2.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында килеп, эш-хәрәкәткә киҫкенлек, етеҙлек, шәплек мәғәнәһе бирә. *Шатырлатып уҡыу. Шатырлатып һөйләп биреү. Шатырлатып тартып алыу.* ■ *Ирке менән бирмәһәләр, шатырлатып алабыҙ* (Халыҡ йырынан).

**ШАТЫРЛАУ** *ҡ.* **1.** Шатыр-шотор итеү, шатыр-шотор килеү. *Шатырлап һыныу.* ■ *Халыҡтың ҡыҫымы аҫтында ишек шатырлай башланы.* Х. Мохтар.

**2.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында килеп, бик ҡаты, ныҡ тигән мәғәнәне бирә. *Шатырлап туңыу.*

**ШАТЫРТ** *окш.* Бер генә тапҡыр шатырлаған тауышты белдергән һүҙ.

**ШАТЫР-ШОТОР, шатыр ҙа шотор** *окш.* Ҡабат-ҡабат шатыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шатыр-шотор итеү. Шатыр-шотор килгән тауыш. Шатыр-шотор атыу. Шатыр-шотор тырнау. Шатыр-шотор һыныу.* ■ *Шатыр-шотор килеп хәрби эшелондар үтеп тора.* Д. Исламов.

**ШАУ** [1] *окш.* **1.** Бер төрлө генә шаулап торған тоноҡ тауышты белдергән һүҙ. *Шау итеп ҡалыу. Шау килеп кул сабыу.* ■ *Алыусылары ла, һатыусылары ла шау килеп һөйләшә, кул һуғыша.* Ғ. Дәүләтшин. *Күк йөҙөндә саф тауыштар шау итә.* Ш. Бабич.

**2.** *и. мәғ.* Күмәк, дауамлы тауыш. *Баҙар шауы. Тулҡын шауы. Урман шауы.* ■ *Зәңгәр күк йөҙөнә олғашалар .. мотор шауҙары.* М. Тажи. / Эш-хәрәкәттән килгән йәнлелек. *Хеҙмәт шауы.* ■ *Ҡала үҙенең мөһабәт ғорур шауы менән йәшәй.* З. Биишева.

**3.** *и. мәғ. күсм.* Күңелдә уянған бошоноу, ҡурҡыу тойғоһо; шом. *Йөрәккә шау һалыу.* ■ *Яңғыҙ толпар тояғы дошманына шау булмаç.* «Ҡараһаҡал».

**ШАУ** [2] *р.* **1.** Һәр ваҡыт, гел. *Шау бергә йөрөү.* ■ *[Таңсулпан:] Эй, кешеләр! Ғүмер баҡый шулай теш ҡыҫып, зар иларғамы ни шау ғына.* М. Тажи.

**2.** Бөтөнләйе менән, тотош. *Шау алтын. Шау ебәк. Шау биҙәк.* ■ *Уралымды байҡа буйҙан-буйға: һәр аҡланы уның шау сәскә.* М. Уразаев.

**ШАУ-ГӨЖ** *окш. ҡар.* **шау-гөр.** *Шау-гөж килеү. Шау-гөж итеү.*

**ШАУ-ГӨР** *окш.* Көслө күмәк тауышты белдергән һүҙ. *Шау-гөр булып шаулашыу.* ■ *Халыҡ шатлыҡтан шау-гөр килә* (Әкиәттән).

**ШАУҘЫМ** *с. диал.* Дөрөç түгел, ялған. *Шауҙым хәбәр.*

**ШАУҘЫР** *окш.* Кипкән ҡоро нәмәләр ҡойолоп киткәндә, буталғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шауҙыр итеп түгелеү. Шауҙыр итеп таралып төшөү.*

**ШАУҘЫРАУ** *к. ҡар.* **шауҙырлау.**

**ШАУҘЫРЛАТЫУ** *к.* Шауҙыр-шауҙыр иттереү, шауҙыр-шауҙыр килтереү. *Ел ағас япраҡтарын шауҙырлатып тараны.* Ш. Янбаев.

**ШАУҘЫРЛАУ** *к.* Шауҙыр итеү, шауҙыр-шауҙыр килеү. *Шауҙырлап ҡойолоу. Шауҙырлап торған тәңкә.* ■ *Елһеҙ генә көнө шауҙырлайҙыр Буртөшкәнкәй күлдең ҡамышы* (Халыҡ йырынан).

**ШАУҘЫРЛАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **шауҙырлау.** *Тополдәрҙең һары япраҡтары .. шауҙырлашып ағас төптәренә түгелер.* Ғ. Сәләм.

**ШАУҘЫР-ШАУҘЫР** *окш.* Ҡабат-ҡабат шауҙыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шауҙыр-шауҙыр итеп тороу.*

**ШАУҠАЛ** [1] *с.* Эре һөйәкле, ҡаҡса. *Шауҡал мал һимермәй.*

● *Шауҡал ат көслө, шауҡал һыйыр һөтлө була.* Әйтем.

**ШАУҠАЛ** [2] *и.* Ҡулдың бармаҡ төбө тоташҡан быуыны.

**ШАУҠЫМ** *и.* Берәй эш-хәлдең ниндәйҙер тәьҫире һәм уның һөҙөмтәһе, шауҡын. *Шауҡымы тейеү.* ■ *Үҙем был арала әллә нишләп ауырып торам, .. үрәсә аҫтына ҡалып билемде имгәткәйнем. Ахыры шуның шауҡымы ҡалды.* М. Ғафури.

**ШАУҠЫМЛЫ** *с.* **1.** Насар йоғонто яһай торған. *Шауҡымлы эш.*

**2.** *күсм.* Зиһене теүәл түгел, иҫәр. *Шауҡымлы кеше.*

**ШАУҠЫН** *и. ҡар.* **шауҡым.**

**ШАУҠЫУ** *к.* Ҡалҡаңлаған таҡтаның ауырыраҡ башы еңеп төшөү; сүмәксеү. *Иҙән таҡтаһы шауҡып китте.*

**ШАУЛАТЫУ** *к.* **1.** Шау-шыу килтереү; тауышландырыу. *Балаларҙы шаулатыу. Ел япраҡты шаулата.*

**2.** Шау-шыу иткән тауыш сығарыу. *Бына бер ваҡыт шаулатып ямғыр ҡоя башланы.* Ф. Рәхимғолова.

**3.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында килеп, бик яҡшы, бик шәп тигән мәғәнәне бирә. *Шаулатып туй яһау. Шаулатып донъя көтөү.*

**ШАУЛАУ** *к.* **1.** Тауыш сығарыу, шау килеү; гөүләү, гөжләү. *Шаулап ағыу. Шаулап ҡайнау. Урман шаулай.* ■ *Әллә ҡайҙан шаулап килгән снарядтар беҙҙән дүрт-биш саҡырым үҙып төшөп, .. ҡойондар аҡтара.* Д. Юлтый. *Ҡуй самауыр, шаулаһын, һал күмерен, йырлаһын* (Халыҡ йырынан).

**2.** Шауға күмелеү. *Ике көн инде беҙҙең баш осонан торпалар оса, ике көн инде тирә-яҡ торпалар тауышынан шаулап тора.* Ф. Әсәнов.

**3.** Берәй сәбәптән шау итеп геүләп тороу; геү, шау иткән тауыш ишетелеү (башҡа, ҡолаҡҡа ҡарата). *Баш шаулай. Ҡолаҡ шаулай.* ■ *[Рәшиҙә:] Әллә башыма еҫ тейҙе инде, ҡолаҡтарым да шаулап тора.* М. Тажи.

**4.** Күмәкләп тауышланыу, шау-шыу килеү. *Мәжлес шаулай. Халыҡ шаулай.* ■ *Наилә бөтәһенә ҡарап: — Ниңә улай тынып киттегеҙ, баяғыса шаулап ултырығыҙ,— тине.* С. Агиш. *Шаулап тора мәктәп. Клуб яңғырай.* Ғ. Амантай. / Ризаһыҙлыҡ белдереп тауышланыу. *Сәбәпһеҙ шаулау.* ■ *Ҡыҙ Һәүбәнгә: Егеткәйем шаулама, атым һорап даулама.* «Аҡбуҙат».

**5.** Һөйләп ишеттереү, кешегә таратыу. *Кешегә һөйләп, шаулап йөрөү.* ■ *[Яҡуп:] Һин Тимеркәй, был турала хәҙергә шаулама, бер нәмә булмаған төҫлө йөрөй бир.* Б. Бикбай.

**6.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында килеп, бик яҡшы, бик шәп тигән мәғәнәне бирә. *Шаулап үҫеү.* ■ *[Мәмбәтшә] шаулап йәшәһә лә, шыпшым үлгән.* Б. Бикбай.

**ШАУЛАШЫУ** *к.* Күп, күмәк булып тауышланыу; шау-гөр килеү. *Шаулашып ултырыу. Шаулашып килеп инеү.* ■ *Пассажирҙар шаулашып ишек төбөнә өйөлөштө.* Р. Низамов. *Ел иҫте, тулҡынланды күл өҫтө, бар ағастар шаулашты.* Ш. Бабич.

**ШАУЛЫ** *с.* **1.** Шау-шыу менән тулы, шаулап торған; тауышлы. *Шаулы урам. Шаулы урман. Шаулы диңгеҙ.* ■ *Тәҙрә аша беҙҙең алдан үтә ҙур ҡалалар, шаулы урмандар.* Ғ. Сәләм.

**2.** *күсм.* Шау-шыулы, ҙур ваҡиғаларға бай булған. *Шаулы тормош. Шаулы йылдар.*

**ШАУМА** *с.* Ҡатлауланып, ишелеп торған, шаумаҡ (таш, балсыҡҡа ҡарата) *Ауыл Селтер-*

*бай тигән шаума ташлы ялангас бер тауға һөйәнеп кенә ултырған.* Ж. Кейекбаев.

**ШАУМАК** *и. кар.* **шаума.**

**ШАУРАУ** [1] *к.* **1.** Нык кибеүҙән, короуҙан һ. б. онталыу, таралыу. *Елгә шаурап төшөү. Эҫегә шаурау.* ■ *Бесән ныҡ кипкән, шаурап тора.* / Онталып койолоу, таралыу. *Тау һәм сағылдарҙың .. көн битенә караған түбәләрендәге таштар шаураған, урыны-урыны менән һикәлтәләр хасил булған.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *күсм.* Тырым-тыракай булыу, туҙыу, кыйрау. *[Катындың] имсәк балаһы кала илап, донъяһы ятып кала шаурап, .. үҙе сыға ла китә* (Әкиәттән).

**ШАУРАУ** [2] *с.* Ыуалып, онталып торған, кәрәгенән артык кипкән. *Шаурау улән.*

**ШАУШАК** [1] *и.* Кулдың кушкар менән ус һөйәктәре араһындағы өлөшө. *Шаушак һөйәге.* ■ *Уның ике кулын да шаушактан киҫеп ташлағандар.* Х. Мохтар.

**ШАУШАК** [2] *с. диал.* Яшык, бик ныкябык.

**ШАУ-ШЫУ** *окш.* **1.** Күмәк тауышты белдергән һүҙ. *Шау-шыу итеү.* ■ *Һары ла камыш беҙҙең күлдәрҙә, шау-шыу килә каты елдәрҙә* (Халык йырынан).

**2.** *и. мәғ.* Гөж килеп торған күмәк тауыш. *Шау-шыу тынды.* ■ *Колак тондорғос шау-шыу йәнде тетрәтә.* Д. Исламов. *Һөйәм, калам, һинең шау-шыуыңды, машиналар, гудок тауышын.* Н. Нәжми. / *күсм.* Иреш-талаш, ығы-зығы, кыскырыш. *Шау-шыу күтәреү.* ■ *Шау-шыу китте, Ғәйни ағайҙы «бур» тип түкмай ҙа башланылар.* Т. Йәнәби.

**ШАУ-ШЫУЛЫ** *с.* Күмәк тауышлы, кыскырышлы; шаулы. *Шау-шыулы урам.* / Ығы-зығылы, бәхәсле. *Шау-шыулы эш.* ■ *Бындай шау-шыулы .. сход Айҙакайҙың ғүмерендә беренсе тапкыр булғандыр.* Һ. Дәүләтшина.

**ШАУЫК** *и. диал.* Саука.

**ШАУЫТ** *и. диал.* Сауыл.

**ШАФИК** [*ғәр.*] *с. иҫк.* **1.** Шәфкәтле, рәхимле.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ШАФТАЛЫ** *и.* **1.** Гөлйемеш сәскәлеләр ғаиләһенә караған муйыл япраклы көньяк емеш ағасы. *Шафталы ағасы. Шафталы сәскәһе.*

**2.** Шул ағастың һарғылт кыҙыл төҫтәге йөнтәҫ кабыклы, эре һөйәкле итләс емеше; персик. *Шафталы вареньеһы. Шафталы һуты.*

**ШАХМАТ** [*фарс.*] *и.* 64 шакмактан торған тактаға 16 ак һәм 16 кара фигураларҙы кара-каршы теҙеп тейешле тәртиптә уйнай торған уйын; сатраш, шатраныж. *Шахмат фигуралары. Шахмат уйнау.*

**ШАХМАТСЫ** *и.* Шахмат уйнаусы. *Беренсе разряд шахматсы. Шахматсылар конкурсы.*

**ША́ХТА** [*нем.*] *и.* **1.** Ер аҫтынан каҙылма байлык сығара йәки ер аҫты эштәре алып бара торған урын. *Күмер шахтаһы. Метро шахтаһы. Шахта ауыҙы. Шахта каҙыу. Шахтаға төшөү. Шахтала эшләү.*

**2.** *тех.* Кайһы бер королмаларҙағы коҙок рәүешендәге кыуышлык. *Турбина шахтаһы. Лифт шахтаһы.*

**ШАХТЁР** [*рус.*] *и.* Шахтала (1 мәғ.) эшләгән тау эшсеһе.

**ШАҺ** [*фарс.*] *и.* Кайһы бер көнсығыш илдәр ҙәге монарх титулы һәм ошо титулды йөрөткә[н] кеше. *Шаһ тәхете. Шаһ булыу.* / *күсм.* Нимәнең дер хужаһы, батшаһы. *Беҙ бараһы юлдар хая[...] шаһы кояштан да якты.* Х. Кунакбай.

**ШАҺАНӘ** [*фарс.*] *р.* **1.** Шаһтарса.

**2.** (*баш хәреф менән*) Катын-кыҙ исеме.

**ШАҺБАЗ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ыласын ко[ш] шоңкар. *Бына килә инде яҙҙар, илебеҙгә килер ме икән үрҙәк-каҙҙар, юлдарында сағ-сәләмә[т] булып улар, тотмайынса бөркөт, ыласын, шаһ баздар.* С. Якшығолов. / *күсм.* Кыйыу, баты[р] кешегә карата әйтелә. *Беҙ тағы бер шаһбаздың балаһы инек.* Акмулла.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ШАҺЗАДА** [*фарс.*] *и.* **1.** Шаһ улы, батша улы

**2.** Тәхет вариҫы.

**3.** (баш хәреф менән) Ир-ат исеме.

**ШАҺИНШАҺ** [*фарс.*] *и.* Иран шаһының титулы һәм шул титулды йөрөткән кеше.

**ШАҺИНӘ** [*фарс.*] *и.* **1.** Шаһ катыны.

**2.** Катын шаһ.

**ШАҺИТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ниндәйҙер эш-хәлде күре[п] белгән кеше. *Шаһит булыу.* ■ *Һуңғы бәрелеш үтте, кай беребеҙ шаһитылыр ул ҙур көндәрҙең* Ғ. Сәләм. / Ниндәй ҙә булһа хәл-вакиға булы[п] үткән урындағы йәнһеҙ нәмәләргә карата. *Тарихи вакиғалар шаһиты.* ■ *Исмәғилдең башынан үткәндәрҙең барыһына ла шаһит был яңғы[ҙ] кайын.* Я. Вәлиев. *Урал!.. үткән көрәш өсө[н] һин ҙур шаһит.* М. Тажи.

**2.** Үҙе күргән енәйәт хакында судта күрһәтм[ә] биргән кеше. *Шаһит итеп сакырыу. Шаһитта[р] һорау алыу.* ■ *Суд ултырышының икенсе көн[ө] башланды. Бөгөн эш шаһиттарҙан һорау алыу[ҙ]ан башлап ебәрелергә тейеш ине.* Ғ. Әмири.

**3.** Нимәнелер рәсми рәүештә дөрөҫләү өсө[н] эш-вакиғала катнашкан кеше. *Васыятнамән[ы] шаһиттар алдында уҡыу.*

● *Ялғансының шаһиты янында булыр.* Әйтем

**ШАҺИТЛЫК** *и.* Шаһит булған хәл. **Шаһитлы[к] биреү** судта шаһит булып, үҙең күргән-белгәнд[е] һөйләү.

**ШАҺИТНАМӘ** [*ғәр.* ⟨ *фарс.*] *и. иҫк.* Шаһиттың күрһәтмәһе яҙылған кағыҙ.

**ША́ШКА** [*рус.*] *и.* **1.** 64 шакмактан (йөҙ һә[м] йөҙ кырк дүрт тә булырға мөмкин) торған так таға 12 ак һәм 12 кара (егерме һәм утыҙ ҙа булырға мөмкин) фигураларҙы кара-каршы теҙе[п] тейешле кағиҙә буйынса уйнай торған уйын сатраш. *Шашка уйнау. Шашка буйынса ярыш*

**2.** Шул уйында кулланылған ак һәм кара түңәрәктәр. *Ак шашка.*

**3.** Шартлатыу эштәрендә кулланылған түңәрәк формала эшләнгән шартлаткыс. *Тол шашкаһы.*

**ШАШКАСЫ** *и.* Шашка (1 мәғ.) уйнаусы *Шашкасылар ярышы.*

**ШАШКЫН** *с.* Саманан тыш ярһыу; котороңко *Шашкын хис. Шашкын хыял.* ■ *Капыл башк[а] шашкын бер уй килә.* Ә. Чаныш. / Ошондай хискә тулы. *Йөрәк шашкын әле, күкрәк ташкын яңы тормош йырын йырлармын.* Х. Ғабитов.

**ШАШЛЫК** *и.* Шешкә теҙеп кыҙҙырылған ит *Бешә былау, төтәй шашлык урамдарҙы еҫк[...]*

*күмеп: уяна боронго кала, мәңге бер үк төҫкә инеп.* М. Ғәли.

**ШАШТЫР** *окш.* Кипкән япраҡ, ҡағыҙ биттәре бер-береһенә тейгәндә сыҡкан тауышты белдергән һүҙ. *Шаштыр итеү.*

**ШАШТЫРЛАТЫУ** *к.* Шаштыр-шоштор иттереү, шаштыр-шоштор килтереү. *Дәфтәремде шаштырлатып сумкамдан алам да өҫтәлгә шапылдатып һалам.* Н. Мусин.

**ШАШТЫРЛАУ** *к.* Шаштыр итеү, шаштыр-шоштор килеү. *Шаштырлап торған каты кағыҙ.*

**ШАШТЫР-ШОШТОР** *окш.* Ҡабат-ҡабат шаштыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шаштыр-шоштор итеү. Шаштыр-шоштор килеү.*

**ШАШТЫРЫУ** *к.* **1.** Шашырға ирек ҡуйыу; ҡотортоу. *Баланы шаштырыу.*

**2.** *күсм.* Булмағанды өҫтәп, арттырыу. *Шаштырып һөйләү.* ■ *Мин бик күп һунарсыларҙы беләм. Уларҙың күпселегә мәҙәк һөйләй, күргәнен шаштырып, кабартып ебәрә торған кешеләр ине.* С. Кулибай.

**ШАШЫНДЫРЫУ** *к.* Шашынырға, саманан тыш ҡыланырға ирек ҡуйыу. *Бер катындың шулай телләшеп тороуы Өлкаман байҙы шашындырып ебәрҙе.* Ш. Насыри.

**ШАШЫНЫУ** *к.* **1.** Көслө хис менән ярһыу. *Шашынып һөйләү.* ■ *Карап торһаң яҙгы ташкынга, күкрәк тулып, йөрәк шашына.* Ғ. Амантай.

**2.** Ҡыҙыу төҫ алыу, көсәйеү, ярһыу, ҡотороноу. *Ташкындар шашынып, .. һикереп уйнарга керешә.* З. Биишева.

● *Шатлык күрһәң шашынма, каза күрһәң көйөнмә.* Әйтем.

**ШАШЫУ** *к.* **1.** Көслө хискә бирелеп ярһыу. *Мөхәббәттән шашыу. Шашып бейеү.* ■ *Беҙ урманда тик икәүҙән-икәү шашып йөрөнөк.* Н. Нәжми. *Ярышып шул тай-тулактар менән һандуғастар шаша таллыкта.* Р. Ғарипов.

**2.** Саманан тыш ҡыланыу; ҡотороу. *[Ныязгол — Айбулатка:] Етәр, тием!.. Өндәшмәгән һайын шашаһың!* Һ. Дәүләтшина. *[Котлобирҙе:] Шашты был әҙәм, шашты! Берәр гәзит, берәр журнал алгас, етмәгәнме! Һәр бер өйгә өс-дүрт журнал да биш-алты гәзит.* Р. Солтангәрәев.

**3.** Сиктән тыш көсәйеү, ярһыу; ҡотороноу. *Дауыл шаша. Диңгеҙ шаша.* ■ *Ауыҙлыкты тешләне лә сапты уйҙарым шашып.* М. Кәрим.

♦ **Аҡылдан шашыу** *кар.* **аҡыл.**

**ШАЯН** *с.* **1.** Шаярырға, уйнарға яратыусан, уйын-көлкөгә әүәҫ. *Шаян тәбигәтле. Шаян сак.* ■ *[Өммөкәй Йәнеш хакында:] Ҡыҙ бик шаян көләгәс булмаксы. Әсәһе кеүек томһа булмаҫ был.* З. Биишева. / Ошондай кешегә хас. *Шаян караш. Шаян тауыш. Шаян төҫ менән.* // *Шаян көлөү.* ■ *Шаян күҙҙәр кеүек бызылдашып якты йондоҙҙар калктылар.* Һ. Дәүләтшина. / Уйнарға, шаярырға яратҡан (йәнлектәргә ҡарата). *Шаян тай-тулак.* / *шигр.* Уйнаған һымаҡ етеҙ хәрәкәтле. *Шаян нурҙар.* ■ *Шаян тулкындарҙы тәгәрәтә киске елдәр баҫыу өҫтөнән.* Ғ. Хәйри. *Шаян елдәр күйындарга инеп, кытыклап, эш улдарын йоконан уятты.* Ғ. Амантай.

**2.** Шаярыуға ҡоролған, мәрәкәле, ҡыҙыҡ. *Шаян бейеү. Шаян йыр.* ■ *[Хужаның катыны] шаян һүҙҙәр һөйләй, һәр вакыт кыскырып йырлап йөрөй.* Д. Юлтый.

**ШАЯНЛАНЫУ** *к.* Шаянға (1 мәғ.) әйләнеү, шаян булыу. *[Самсон:] «Тамам шаянланганһың икән, малай», — тип көлөп куйҙы.* Т. Йәнәби. / Шаян ҡыланыу, шаярыу. *Шаян кешене һәр кем ярата. Ләкин артык шаянланыу күп вакыт үҙеңә зыян килтереү менән дә бөтә.* Ғ. Хәйри.

**ШАЯНЛЫҠ** *и.* Шаян кешегә хас сифат. *Йәшлек шаянлыгы.*

**ШАЯРТЫУ** *к.* **1.** Шаярырға, уйнарға ирек ҡуйыу. *Баланы шаяртыу.*

**2.** Кем менәндер ысынтыламай, уйнап эш итеү. *Шаяртып һөйләшеү. Шаяртып әйтеү.* / Мәрәкәләп, уйынсалап ирештереү. *Сәлим агай гәжәп шаян егет. Ул һирәк кайта, кайткан мәлдә генә минең менән арыу һөйләшә. Бер аҙ вакыт үткәс тә, мине шаяртырга, минән көлөргә тотона.* Д. Юлтый. **Һүҙ шаяртыу** шаяртып һөйләшеү, мәрәкә өсөн әйтеү.

**ШАЯРЫУ** *к.* **1.** Йүгереп, һикереп уйнау, төрлө уйын менән күңел асыу. *Малайҙар зык кубып шаяра.* Б. Бикбай. *Өмәселәр .. эшләйҙәр ҙә ярышып бер тына, уйнап туктап, йырлап, шаярып алгас, тагы кыҙышып эшкә тотона.* Ғ. Амантай.

**2.** Ҡыҙыҡ күреп, ни менәндер булышыу; уйнау. *Һыу менән шаярыу. Эт менән шаярыу.* / Кем менәндер булышыу. *Ул [кыҙ] миңә бәйләнә, минең менән шаяра, танауҙан кыҫа, биттән һыйпай.* Д. Юлтый.

**3.** Уйын-көлкөгә бороу, уйынсалау, мәрәкәләү. *Шаярып һөйләшеү. Шаярып әйтеү.* ■ *Был вакытта шаулашып, көлөшөп, төрлө әңгәмә табып шаярган йәштәр ҙә .. үҙ эшенә тотонган.* Һ. Дәүләтшина. / *күсм.* Берәй мәсьәләгә еңел ҡарау, уйламай эш итеү; уйнау. *Йөрәк менән шаярыу. Яҙмыш менән шаярыу.* / *күсм.* Берәй мәсьәләгә ҡағылышлы эштә хилафлыҡ ҡылыу. *Ҡатын-кыҙ менән шаярыу.* ■ *Һине, кустым, урман менән шаяра, тип һөйләйҙәр. Был кылыгың ысын булһа, боҙок юлга баҫаһың.* Н. Мусин.

**4.** Етеҙ хәрәкәттәр яһау; уйнау (тәбиғәт күренешенә бәйле хәлгә, хайуандарға һ. б. ҡарата). *Ай Ырғыҙ йылгаһының тулкындарында өнһөҙ шаяра.* Һ. Дәүләтшина. *Кәзәләр ылыктары менән кәртә өҫтөнә менеп, төкөшөп, шаярып йөрөйҙәр.* Ғ. Дәүләтшин.

**ШАЯРЫШЫУ** *к. урт. кар.* **шаярыу** 1, 2. *Шаярып йөрөү.* ■ *Елдәр менән бергә шаярышып тулкынланган алтын башактар.* Ғ. Амантай.

**ШАЯТИН** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Шайтан. *Аптырау алды шаятин мәхшәрен, бар ҙа йүнәлткән сәмага баштарын.* Ш. Бабич.

**ШВАРТО́В** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и. диңг.* Причалға туҡтаған карапты бәйләп ҡуя торған арҡан йәки сым. *Арканды сырнап куябыҙ ҙа команда көтәбеҙ. Командирҙың тауышын ишетеү менән моторҙы эшкә кушам, ә ярҙамсым арканды күҙәтә, швартовты рәтләй.* Р. Низамов.

**ШВЕД** *и.* Швецияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (Герман телдәренең береһендә һөйләшә) *Швед халкы. Швед кыҙы. Швед теле.*

**ШВЕЙЦА́Р** [1] [*рус.* ⟨*нем.*] *и.* Ҡунаҡхана, ресторан йәки башҡа ҙур йорттарҙағы тышҡы ишек төбөндә торған һаҡсы. *Ҡунаҡхана швейцары.* ■ *Авзал карт швейцар — институтка ингән, сыҡҡан кешеләрҙе тикшереп тора.* С. Агиш.

**ШВЕЙЦАР** [2] *и.* Швейцарияның халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе. *Швейцар халҡы. Швейцар ҡыҙы.*

**ШЕБӘ** *и. диал.* Ишкән еп.

**ШЕВИО́Т** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* Өҫ кейеме тегеү өсөн ҡулланылған әҙ генә өбөрөлө, йоҡа йомшаҡ йөн туҡыма. *Ҡара шевиот. // Шевиот костюм.*

**ШЕВРО́** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Кәзә тиреһенән эшләнгән йомшаҡ күн. *Һары шевро. // Шевро итек.*

**ШЕДЁВР** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Оҫталыҡ үрнәге булырлыҡ, һоҡландырғыс сәнғәт әҫәре. *Әҙәбиәт шедевры. Музыка шедевры. Донъя әҙәбиәте шедеврҙары.* ■ *[Башҡорт] опера театры хәҙерге заман музыка шедеврҙарынан Прокофьевтың Ромео һәм Джульетте» исемле балетын сәхнәләштерҙе.* Р. Хәкимов.

**ШЕЗЛО́НГ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* Арҡа терәп ятырлыҡ итеп эшләнгән еңел кресло. *Шезлонгыға ятыу.* ■ *Кис. Урал шезлонгыға ятҡан. Эргәһендә китап өйөмө.* Ә. Мирзаһитов.

**ШЕКӘРӘ** *и.* **1.** Йән эйәләре организмындағы үтә күренмәле йоҡа ғына яры. *Һум ит шекәрәһе. Һеңер шекәрәһе. Йоморҡа ағы шекәрәһе.* / Нәмәләрҙең өҫтөнә ултырған ошо рәүештәге ҡатлау. *Биҙрәләге һыу шул ике арала семәрле боҙ шекәрәһе менән ҡапланып та өлгөргәйне.* Ш. Янбаев. / *күсм.* Ҡаплап, томалап торған нәмә. *Күҙ күреме етмәҫ ерҙә ашлыҡ йәшәрә, шекәрә аша Нәрәш тауының шәп-шәрә ташы .. күренә.* Т. Килмөхәмәтов.

**2.** Күҙҙең ҡараһын ҡаплап үҫкән яры; аҡ.

**3.** Ҡайнаған һөт өҫтөнә ултырған йоҡа яры; ҡаҫмаҡ. *Һөт шекәрәһе.*

◆ **Шекәрә болот** бөҙөркәле йоҡа ғына аҡ болот. **Шекәрә май** эсәк араһынан алынған ярылы май.

**ШЕЛЕ** *с. диал.* Бысый. *Шеле икмәк.*

**ШЕЛТӘ** *и.* Ярамаған эш өсөн ризаһыҙлыҡ белдереп, киҫәтеп әйткән һүҙ. *Шелтә яһау.* ■ *[Моталов:] Аңла, кешегә шелтә менән генә ярҙам итеп булмай, ҡайһы саҡ йылы һүҙ ҙә кәрәк.* И. Абдуллин. *Күсәккә әбей бик ныҡ шелтә яһай: Рәхимһеҙ, күргәнем юҡ һиндәй һис кем.* «Бабсаҡ менән Күсәк». / Рәсми киҫәтеү һүҙе. *Ҡаты шелтә Шелтә биреү. Шелтә алыу.* ■ *Һөйләп бирермен мин барыһын .. бик күп булһа шелтә алырмын.* Ғ. Сәләм.

**ШЕЛТӘЛЕ** *с.* Шелтә бирелгән. *Шелтәле ҡараш.* ■ *[Батша:] Әй кейәү, кейәү, мин һине шул тиклем шәп кешелер, тип уйлағайным. Бынан һуң һине һис кенә лә сит итмәм, шелтәле һүҙ әйтмәм* (Әкиәттән).

**ШЕЛТӘЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **шелтәлеү.**

**ШЕЛТӘЛӘҮ** *к.* Шелтә һүҙе менән киҫәтеү; шелтә яһау. *Үҙ үҙеңде шелтәләү.* ■ *Берәүһен тап иткәндер олатайың. Һөйләшә башлаһа, донъяһын онота,— тип Бәҙерниса инәй тәҙрәгә күҙ һала-һала ҡартын шелтәләп ултырҙы.* Р. Ғабдрахманов. *«Үҙ һүҙеңде һөйләйһең»,— тип, шелтәләне бирәү мине.* Н. Нәжми.

**ШЕЛӘГӘЙ** *и. ҡар.* **һеләгәй.** *[Үгеҙ] сабыуҙан, һыҙланыуҙан тамам йонсоған ине. Башын да күтәрә алмай. Ауыҙынан туҡтауһыҙ шеләгәй аға.* М. Кәрим.

◆ **[Ауыҙының] шеләгәйе кипмәгән** йәш кешене кәмһетеп әйтелә. *Ауыҙының шеләгәйе кипмәгән, ҡыҫылып һүҙ һөйләй.* **Шеләгәй ағыҙыу** нимәнелер ашарға ымһыныу, тамшаныу. *[Мәскәй] был ҡыҙҙы күргәс: «Яҡты донъянан түйған кеше бар икән»,— тип ауыҙынан шеләгәйен ағыҙып ҡуйған* (Әкиәттән).

**ШЕЛӘҮКӘ** *и. диал.* Эсәк араһынан алынған ярылы май; шекәрә май.

**ШЕМШЕК** [1] *с. диал.* Еңшек.

**ШЕМШЕК** [2] *с. диал.* Семсек.

**ШЕМӘКҺЕҮ** *к. диал.* Һемәгенән һыу ағыу (самауырға ҡарата).

**ШЕП** *и. этн.* Малды ҡан сығармай үлтереү өсөн ҡулланылған бер яҡ башы осло таш.

**ШЕП-ШИКЕРТ** *и.* Саҡ ҡына ишетелгән, бик аҡрын сыҡҡан тауыш. *Уның ҡолағы һаҡ, бөтә шеп-шикертте ишетә.*

**ШЕП-ШИКЕРТҺЕҘ** *р.* Бер ниндәй тауышһыҙ, шып-шым. *[Таңсулпан] уйға бирелеп бер ни тоймаған, ә Аҫылбай, шеп-шикертһеҙ килеп артынан, .. сәсүрмесе менән уйнаған.* М. Тажи.

**ШЕПШӘ** *с. диал.* Һағыҙаҡ.

**ШЕРИ́Ф** [*рус.* ⟨*ингл.*] *и.* АҠШ, Англия, Ирландияла административ эштәрҙе һәм ҡайһы бер суд йомоштарын башҡарыусы урындағы кеше. *Шериф ярҙамсыһы.*

**ШЕСТЕРНЯ́** [*рус.*] *и.* Хәрәкәтте икенсе механизмға күсереүсе тешле тәгәрмәс.

**ШЕҮӘЙТЛӘҮ** *к. диал.* Юхалау.

**ШЕФ** [*рус.* ⟨*фр.*] *и.* **1.** Етәксе, башлыҡ (ҡул аҫтында эшләгән кешеләренә ҡарата).

**2.** Кемгәлер ярҙам итеүҙе үҙ өҫтөнә алған кеше йәки ойошма. *Шефтар үҫмерҙәрҙең өйҙәге тормошо, уҡыуы менән ҡыҙыҡһына, уларҙы йәмәғәт эшенә ылыҡтыра.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 9 март.

**ШЕФЛЫҠ** *и.* Кемгә йәки нимәгәлер эш, культура, тәрбиә өлкәһендә иптәшлек йөҙөнән систематик рәүештә күрһәтелгән ижтимағи ярҙам эше. *Шефлыҡ ярҙамы. Шефлыҡҡа алыу.* **Шефлыҡ итеү** шеф сифатында ярҙам итеү. *Төҙөлөш ойошмаһы колхоздарға шефлыҡ итә.*

**ШЕШ** [1] *и.* **1.** Төрлө кәрәккә ҡулланылған осло йәпле саталы ағас. *[Солтангәле] шешкә аҫылған баҡырсалағы сәй ҡайнап сығыуын көтмәне.* Я. Хамматов. *Малайҙар балыҡты ҡырсынға түгеп, бүлештеләр. Күп күренгән балыҡ, һәр кем үҙенә тейгән өлөштө шешкә теҙеп алғас, әҙәйҙе лә китте.* Ш. Янбаев. / Ошондай уҡ саталы оҙон ағас (өңдә ятҡан айыуға һөжүм итеү өсөн ҡулланыла) *Өңгә шеш тығыу. Шеш менән ҡурҡытыу.* ■ *[Әбделнәгим бабай:] Ҡар ятҡырған айыуҙы атырға барғайным. Шеш ҡырҡып алдым.* Н. Мусин. / Ошондай уҡ саталы тоҡан епле бәләкәй ағас, ялсы (ау бәйләгәндә башлағыс хеҙмәтен үтәй).

**2.** Ут өҫтөндә ит ҡыҙҙырыу өсөн ҡулланылған осло нәҙек ағас йәки тимер. *[Ҡуҙыйкүрпәс] ҡуяндың тиреһен гунап ботарлай ҙа, .. шешкә ҡаҙап ҡура.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

*Бөгөн төндә төш күрҙем, ут ҡашында шеш күрҙем, шеш осонда ит күрҙем.* «Аҡһаҡ ҡола».

**3.** Еүеш бесәнле кәбән аҫтына һауа йөрөргә юл ҡалдырып эшләнгән таған. *Кәбәнде шешкә һалыу.* ■ *Шешһеҙ кабаланып ҡына тарттырған күбәне һәнәге менән ашыҡ-бошоҡ ҡына төҙәтеп .. Хәким ҡыуышҡа китте.* Я. Хамматов.

**4.** Инәһен иммәһен өсөн быҙау моронона кейҙерелгән, саталы ағастарҙан эшләнгән мороңдоҡ. *Быҙауға шеш кейҙереү.*

**5.** *с. мәғ.* Теп-текә булып тырпайып торған. *Шеш мөгөҙ. Шеш ҡолаҡлы болан.* ■ *Шеш мөгөҙлө ҡуңыр һыйыр киленсәктең теләге* (Туй йырынан).

♦ **Шеш арба** оҙон бүрәнә ташый торған арба. **Шеш ҡолаҡ** ҡуян. **Шеш осона сығыу** насар эш-ҡылыҡтың яҙаһы етеү. *Бөтә цехҡа ҡара яғаһың. Һыраң менән бергә ҡаҙалырһың, шеш осона сығып бараһың.* С. Кулибай.

**ШЕШ** [2] *и.* **1.** Елһенеп, ҡыҙара бирен торған һыҙлаулы урын. *Быуын шеше. Шеш ҡайтыу. Ҡулдың шеше бөтмәгән. // Шеш аяҡ.* ■ *Йырҙар ҡанға буялған, шеш битле, күлдәк-ыштаны өҙгөләнгән малайҙы танымай, уратып алды.* Я. Хамматов.

**2.** Эске йәки тышҡы ағза туҡымаһының аҙып үҫеүенән һәм тарҡалыуынан килгән сир. *Эренле шеш. Шеш сығыу. Шеш һытылыу.* **Яман шеш** йылдам үрсеүле күҙәнәктәрҙән торған яман сир; рак. / *күсм.* Ҡамасау яһаған зыянлы хәл-күренеш. *Кешелек тарихында бөгөн капитализм тигән шеш йәшәй.* Ш. Бикҡол.

♦ **Шеш тулышһа, һытыла** насар эш-ҡылыҡтың барыбер сиге була, яҙаһы килә тигән мәғәнәлә әйтелә.

**ШЕШЕГЕҮ** *ҡ. һөйл.* Тулышып бүртеү; шешмәкләнеү. *Күҙем шешегеп тора.*

**ШЕШЕК** *и.* Ҡыҙарып, эренләп, бүртеп торған тән сире. *Шешек һытылыу. Шешек сығыу.* **Тоҡон шешек** тоташ ҡып-ҡыҙыл булып торған, һытылмаған ауыҙһыҙ шешек.

**ШЕШЕКЛӘҮ** *ҡ.* Тәнгә күпләп шешек сығыу. *Бала шешекләгән.*

**ШЕШЕМҺЕРӘҮ** *ҡ. ҡар.* **шешмәкләнеү.** *Күҙ ҡабаҡтары шешемһерәгән.*

**ШЕШЕНДЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Шешкән һымаҡ итеп бүртендереү.

**2.** Һыуға һалып бүртендереү. *[Үмәр] шешендерергә тип йылғаға һалған тәгәрмәстәрен алырға китте.* Һ. Дәүләтшина.

**ШЕШЕНЕҮ** *ҡ.* **1.** Организмда матдәләр алмашыныуы боҙолоу йәки башҡа сәбәптән шыйыҡсаның тән туҡымаһына күпләп таралыуы. *Аслыҡтан шешенеү. Тән шешенеү.* / Ниндәйҙер сәбәптән организм туҡымаһына ҡан, һыу йыйылыуҙан ҡыҙарып тулышыу; елһенеү (айырым ағзаларға ҡарата). *Аяғы шешенгән. Ҡулы шешенгән.* ■ *[Санияның] төҫөнә ҡарарлыҡ та түгел, илап шешенеп бөткән* М. Тажи. *[Һалдаттың], күҙе-бите шешенеп китте. Уны лазаретка алып һалдылар.* Д. Юлтый.

**2.** Дымға тулышып ҡабарыу; бүртеү. *Һыуға шешенеү. Ямғырға шешенеү.* ■ *Ямғыр һаман яуа. Ғәйзулланың өҫ кейеме ауырайҙы, сабатаһы шешенде.* Я. Хамматов. / *күсм.* Күләм артыу, тулышыу. *Сер йомғағы тамам шешенә, шиңер инә, әйтһәң кешегә.* М. Кәрим.

**ШЕШЕНЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **шешенеү** 1.

**ШЕШЕНКЕ** *с.* Шешенгән һымаҡ тулышып торған. *Шешенке битле.*

**ШЕШЕҮ** *ҡ.* **1.** Сир йәки башҡа сәбәптән ҡыҙарып тулышыу, ҡабарыу; шеш барлыҡҡа килеү. *Ҡара яның шешеү. Эренләп шешеү. Аяҡ быуыны шешеү. Бәрелгән урын шешә.* ■ *Бармаҡтар сейләнә, хатта иртәгеһенә шешеп китәләр.* Д. Юлтый. **Толоп булып шешеү** топ-тотош, ҙур булып шешеү. / Берәй сәбәптән организмда туҡымалар боҙола башлау (ғәҙәттә эске ағзаларға ҡарата). *Яман ҡаты ауырый, һалҡын тейеп шешкән үпкә-бауыры.* К. Кинйәбулатова.

**2.** *ҡар.* шешенеү 1. *Ике сәғәт баҫып торғас, шешәләр аяҡтарың* (Бәйеттән).

**ШЕШКЕ** *и. диал.* Шешек. *Шешке сыҡҡан.*

**ШЕШКӘЙЕҮ** *ҡ.* Шеш һымаҡ теп-текә булып тырпайыу; шештәйеү. *Шешкәйгән ҡолаҡ.*

**ШЕШКӘЙТЕҮ** *ҡ.* Шеш һымаҡ итеп тырпайтыу; шештәйтеү. *Турысай .. тауышын өҙөп, ҡойроғон шешкәйтеп, ҡамышлы һыуы буйына ҡарай бәреп сыҡты ла китте.* Т. Хәйбуллин.

**ШЕШЛЕ** *и. диал. ҡар.* **шеш** [1] 1, 2.

**ШЕШЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **шешләү.** *Шешләнгән ит.* ■ *Мин тал ботағына шешләнгән балыҡтарҙы һүҙһеҙ генә үҙән өҫтөнә ырғыттым.* Ф. Иҫәнғолов.

**ШЕШЛӘҮ** *ҡ.* Нимәнелер осло нәҙек тимергә, саталы ағасҡа, шешкә теҙеү. *Балыҡты шешләү. Итте шешләп ҡыҙҙырыу.* ■ *Ташбулат .. Туҡҡа һалған мурҙаһын ҡараны. Бер ажау менән сабаҡ төшкәйне, талға шешләне лә, тирмән алдындағы келәт ишеге башына элеп ҡуйҙы.* С. Агиш.

**ШЕШМӘ** [1] *и.* Берәй ағза шешеп ауырыу сире. *Тамаҡ шешмәһе. Ҡолаҡ шешмәһе.*

**ШЕШМӘ** [2] *с. диал.* Шешмәк. *Шешмә ҡабаҡ.*

**ШЕШМӘК** *с.* Шешенгән һымаҡ, ҡабарып торған. *Шешмәк ҡабаҡ. Шешмәк бит.*

**ШЕШМӘКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Елһенеп ҡабарып тороу; шешмәк булыу. *[Разия апайҙың] күҙ ҡабаҡтары шешмәкләнеп, ҡыҙарып тора.* Н. Мусин. *[Хәжиәхмәттең] күҙ төптәре шешмәкләнгән. Былай ҙа ҡыҫыҡ күҙҙәре шул арҡала тағы ла ҡыҫылып ҡалған.* Т. Килмөхәмәтов.

**ШЕШТЕРЕҮ** *ҡ.* Шешергә сәбәп биреү. *Үпкәне шештереү.* ■ *Ҡулың бешһә, йә бысаҡ менән ҡырҡһаң, юл үләнен файҙалан. Ул һыҙлауҙы тиҙ баҫа һәм шештермәй.* В. Ғүмәров.

**ШЕШТӘ** *и. диал. ҡар.* **шеш** [1] 4. *Быҙауға шештә кейҙереү.*

**ШЕШТӘЙЕҮ** *ҡ. ҡар.* **шешкәйеү.** *Шештәйеп тороу.*

**ШЕШТӘЙТЕҮ** *ҡ. ҡар.* **шешкәйтеү.** *Йәйләү тып, тик Сагыл башында ҡолағын шештәйтеп, аяҡтарын тек-тек баҫып торат ҡына тора.* М. Буранғолов.

**ШЕШӘ** *и.* **1.** Тар муйынлы оҙонса быяла һауыт. *Буш шешә. Ярты литрлы шешә. Шешә ауыҙы. Шешә тығыны. Бер шешә ҡымыҙ. Ике шешә һөт.*

**2.** *диал.* Быяла. *Тәҙрә шешәһе.*

**3.** *диал.* Шәм ҡыуығы. *Шәмдең шешәһе ватылды.*

**ШЕШӘЙЕҮ** *к. диал.* Шешкәйеү.

**ШЕШӘК** [1] *с.* **1.** Ике йәшлек (инә ҡаҙ һәм ваҡ инә малға ҡарата). *Шешәк ҡаҙ. Шешәк кәзә. Шешәк һарыҡ. Шешәк мал.*

**2.** Өс йәшлек (айыуға ҡарата).

**ШЕШӘК** [2] *и. диал.* Эйәләшкән, эҫенгән урын. ● *Эт шешәгендә картайыр.* Мәҡәл.

**ШЙБЕР** [рус. ⟨ *нем.*] *и. тех.* Завод мейестәрендә шулай уҡ котельныйҙа, газопровод ҡоролмаларында төтөн юлын ҡаплай торған шыуҙырма ҡапҡас.

**ШИБЛЕТ** [*рус.* штиблеты] *и. һөйл.* Штиблет.

**ШИГӘЙЕҮ** *к.* Ниндәйҙер шик менән һағайыу. *Шигәйеп ҡарау.*

**ШИҒАР** [*гәр.*] *и. иҫк.* Юл күрһәткән, йүнәлеш биргән төп фекер. *Ленин. Исеме лә байраҡтарға байраҡ, ҡаныбыҙҙа — уның шиғары.* Н. Нәжми. / Тотҡан юл, принцип. *Полктың шиғары ошонан ғибарәт: беҙ аҡ та түгел, ҡыҙыл да түгел. Беҙ мосолман ғына.* Ф. Иҫәнғолов.

**ШИҒРИ** [*гәр.*] *с.* **1.** Шиғырға, поэзияға мөнәсәбәтле. *Шиғри формалар.* / Рифма менән яҙылған, сәсмә түгел. *Шиғри әҫәр.*

**2.** *күсм.* Хиҫкә бай, нескә. *Шиғри күңел. Шиғри тәбиғәтле.* / Күңелде елкендергән, хисле. *Шиғри моң.* ■ *Шиғри тауыш менән моңландырҙы Ҡырҡты, Ирәндектең кәкүге.* Х. Ғәбитов.

**ШИҒРИЛАШТЫРЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **шиғрилаштырыу.** *[Әҫәрҙә] байҙарҙың атын урлап алып китеүсе ҡараҡтарҙың эше шиғрилаштырыла.* «Әҙәби Башҡортостан», 1960, № 6.

**ШИҒРИЛАШТЫРЫУ** *к.* **1.** Шиғри формаға һалып тасуирлау, шиғыр менән биреү.

**2.** *күсм.* Матур сифаттар биреп тасуирлау; гүзәлләштереү.

**ШИҒРИӘТ** [*гәр.*] *и.* **1.** Шиғыр яҙыу сәнғәте; нәфис һүҙ ижады; поэзия. *Шиғриәт ул нур һәм моң менән бәрәбәр.* Ғ. Хөсәйенов. *Шиғриәттең төп үлсәүе — кеше күңелендә юғары хистәр уятыу, уның аҡылын кешелектең тормош тәжрибәһе менән байытыу.* К. Әхмәтйәнов.

**2.** Көйгә, ритмик үлсәмгә һалынған әҫәр; шиғыр; *киреһе* проза. *Шиғриәт кисәһе.* ■ *Беҙ шиғриәт бәйгеһенә йыйылдыҡ күңелебеҙ тулы йыр һәм наҙ ғына.* К. Кинйәбулатова. / Халыҡтың, дәүерҙең йәки бер шағирҙың барлыҡ шиғри әҫәре. *Башҡорт шиғриәте. Р. Ниғмәти шиғриәте.*

**3.** *күсм.* Нескә хис уятҡан матурлыҡ; гүзәллек. *Башҡорт халҡының оҙон көйҙәрен йырлар өсөн иң элек уларҙың шиғриәтен бөтә нескәлеге, тәрәнлеге менән үҙең тойорға кәрәктер.* З. Биишева.

**ШИҒРИӘТЛЕ** *с.* **1.** Шиғриәткә мөнәсәбәтле, поэзияға бәйле.

**2.** *күсм.* Нескә хиҫкә бай, нескә хис уятырлыҡ. *Башҡортостан — шиғриәтле ер.*

**ШИҒЫР** [*гәр.*] *и.* **1.** Ритмик яҡтан ойошторолоп билдәле бер үлсәмгә нигеҙләнеп ижад ителгән әҙәби әҫәр; теҙмә әҫәр; *киреһе* проза. *Шиғыр кисәһе. Шиғыр сығарыу. Шиғыр яҙыу. Шиғыр уҡыу.* **Аҡ шиғыр** рифмаһыҙ яҙылған шиғыр. *Аҡ шиғырға нигеҙләнеп яҙылған әҫәргә башҡорт әҙәбиәтенән Ҡ. Даяндың «Таңсулпан» драмаһын күрһәтеп була.* К. Әхмәтйәнов. **Ирекле шиғыр** баҫымлы һәм баҫымһыҙ ижек һандары төрлө юлда төрлөсә булған шиғыр.

**2.** *күсм.* Уй-тойғоға ныҡ тәьҫир иткән матурлыҡ, гүзәллеккә ҡарата. *Уралкайҙың аҫты алтын, өҫтө шиғыр, үҙе нур, киләсәктә был ергә хоҙай үҙе ҡыҙығыр.* Ш. Бабич.

**ШИҒЫРСЫ** *и.* Шиғыр яҙыусы, шиғыр сығарыусы. *Беҙҙә сиктән тыш күп шиғыр авторы булыуы менән танылып та, уҡыусылар араһында үҙен шағир итеп таныта алмаған шиғырсыларҙы осратыуы ҡыйын түгел.* Ә. Харисов.

**ШИЗОФРЕ́НИК** [*рус.*] *и.* Шизофрения менән ауырыған кеше.

**ШИЗОФРЕНИ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Психик процестар араһындағы бәйләнеш боҙолоу һәм аҡылға зыян килеү менән характерланған психик ауырыу. *Шизофрения ауырыуы. Шизофрения менән ауырыу.*

**ШИК** [*гәр.*] *и.* **1.** Нимәнендер булыу-булмауына, дөрөҫлөгөнә икеләнеү тойғоһо; шөбһә. *Шик уятыу. Шиккә ҡалыу.* // *Шик булмау. Шиккә һалыу.* ■ *Гөлйөҙөмдө Айбулат алып китеүенә Әхмәҙиҙең шиге ҡалманы.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Нимәлер һиҙеп хәүефләнеү, һағайыу тойғоһо. *Шик төшөрөү.* ■ *Ат һуҡҡан ыңғайға кире сигенде. Өмәттең күңеленә шик төштө. Тирә-яғына ҡарана башланы.* Д. Юлтый. **Шиккә төшөү** 1) ышанмай башлау, шикләнеү хисе уяныу; 2) ҡурҡып шөрләп ҡалыу.

◆ **Шик юҡ** *инеш.* фекерҙең дөрөҫлөгөн раҫлай, ышаныслы булыуын белдерә. *Шик юҡ, уңышты ла күберәк алырбыҙ.* Б. Бикбай.

**ШИКАР** [*фарс.*]: **шикар ҡылыу** *иҫк. кит.* аулау, тотоу.

**ШИКЕЛ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Кешенең тышҡы рәүеше, килеш килбәте, төҫ-сырайы; ҡиәфәт, һын.

**ШИКЕЛЛЕ** *бәйл.* **1.** Төп килештәге исемдәр менән килеп, нәмәнең сифатын йәки ҡылығын икенсе нәмәнекенә оҡшатҡанда ҡулланыла; һымаҡ, кеүек. *Ут шикелле ҡыҙыу. Һыуҙағы балыҡ шикелле йылғыр.* ■ *Ҡайнарлыҡта ҡояш — йөрәк кеүек, йөрәк ҡайнар, ҡояш шикелле.* Р. Ниғмәти. *Күк вагондар тауға ышыҡланды, ашығып ҡаскан йылан шикелле.* Ғ. Сәләм.

**2.** *мөн.* Шартлы фараз төшөнсәһен биреү өсөн ҡулланыла; буғай. *Уҡып булмаҫ шикелле.* ■ *Ныязғол да ул эште тырышып йөрөп ослаңы шикелле.* Һ. Дәүләтшина.

**ШИКЕТҺЕҘ** *с. диал.* Килбәтһеҙ, һынһыҙ. *Шикетһеҙ кеше.*

**ШИКЛЕ** *с.* **1.** Шик уятҡан, шик тыуҙырған; ышаныс һыҙ. *Шикле кеше. Шикле һүҙ. Шикле булыу.* // *Шикле һиҙелеү.* ■ *Фәхриҙең .. ниндәйҙер шикле кешеләр менән бәйләнеш тотоуын Яҡуп күптән һиҙенеп килә.* Б. Бикбай. / Шик белдергән, шиге булған. *Шикле ҡараш. Шикле уйҙар.*

**2.** Күңелдә шом уятҡан; шомло. *Шикле тауыш. Шикле хәл. Шикле булыу.* ■ *Таң атып килә .. Неман йылғаһы өҫтөндә һөт кеүек аҡ томан аға. Тирә-яҡ шикле тынлыҡҡа сумған.* Ә. Бикчәнтәев. // *Был хәл шикле тойолған уға [милиционерға].* Б. Бикбай.

● *Шикле шикләнер, ҫәкмәнен бөркәнер.* Мәҡәл.

**ШИКЛӘНДЕРЕҮ** *к.* **1.** Шик уятыу, шиккә һалыу, шиккә төшөрөү. *Ырымбурҙағы хөкүмәттең дутовсылар, байҙар, муллалар, Нигмәтулла карак кеүек әҙәмдәр менән бәйләнештә булыуҙары шикләндерә Колсобайҙы.* Я. Хамматов.

**2.** Һағайырға мәжбүр итеү, ҡурҡытыу, шөрләтеү. *Таныш булмаған ер шикләндерә.*

**ШИКЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Кем йәки нимәгәләр ҡарата шик тотоу. *Һүҙҙең дөрөҫлөгөнә шикләнеү. Шикләнеп ҡарау. Шикләнеп ҡуйыу.* ■ *Акты ҡара тиһә — шикләнмәнең, дуҫты дошман тиһә — ышандың.* М. Кәрим. *Йөрөй торғас, урлашырға шәйләп йөрөгән кеше тип шикләнмәһәләр ярар ине, тип уйлап ҡуям.* Т. Йәнәби.

**2.** Бер аҙ ҡурҡыу, шөрләү. *Завод тирәһе .. ҡурҡыныс ине. Шикләнеп артыма ҡараным.* С. Агиш. *Ихласым юк, баҫмай аяк, йөрөмәй ҡул; әллә ниҙән шикләнәм һәм шомланам.* Ш. Бабич. / *һөйл.* Йоғошло тип һанап ерәнеү; сикәнеү. *Ауырыуҙан шикләнеү.*

**ШИКСЕЛ** *с.* **1.** Бөтә нәмәгә шикләнеп ҡараған, ышанмаған. *Шиксел кеше. Шиксел булыу.*

**2.** Һәр нәмәнән һағайып, хәүефләнеп торған. *[Шәйхи] өҫтәүенә шиксел, юк-барға ышаныусан .. Йүткерһә лә, тымау төшһә лә: «Зарарлы сир булып ҡуймаһа ярар ине»,— тип ҡото оса.* Р. Солтангәрәев.

**ШИКҺЕҘ, һис шикһеҙ** *инш.* Фекергә ҡәтғилек бирә, ышаныслы, ныҡлы фаразды белдерә. *Зөһрә лә, Ғәлиә кеүек, мәҙрәсәгә барып уҡыһа, шикһеҙ, тәбиғәте боҙолор, холҡо ла үҙгәрер ине.* М. Ғафури.

**ШИКҺЕНЕҮ** *к. кар.* **шигәйеү.** *Ҡурҡып шикһенеү.* ■ *Шул рәүеш торғанда ҡурҡып, шикһенеп,.. ут вә осҡондар бөтә, күк тын ҡала.* Ш. Бабич.

**ШИК-ШӨБҺӘ** [*ғәр.*] *и. йыйн.* Ышанып етмәй икеләнеү, хәүефләнеү тойғолары. *Шик-шөбһәгә бирелеү. Шик-шөбһәнән ҡотолоу. Шик-шөбһәгә төшөү.*

**ШИКӘЙӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Кемгәләр йәки нимәгәләр ҡарата ризаһыҙлыҡ белдергән зар һүҙе. *Юғары ҡатлам үҙҙәренең вәкилдәрен ебәреп,.. шикәйәттәрен һөйләгән.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**2.** Ниндәйҙер шәхестең йәки ойошманың берәй кешегә ҡарата законһыҙ эш итеүе хаҡында рәсми белдереүе; ялыу. *Шикәйәт яҙыу.* ■ *Кемгә барайыҡ беҙ илап, ҡылып ғырыз, шикәйәтте ҡай урынға беҙ бирәйек* (Бәйеттән).

□ **Шикәйәт итеү** (*йәки* **ҡылыу**) 1) нимәгәләр һуҡраныу; зарланыу. *Ул ауырыйым, тип шикәйәт итмәне.* М. Ғөбәйҙуллин; 2) ялыу яҙыу. *[Ҡатын проводникка:] .. Ниңә һин пассажирҙарға тынғы бирмәйһең! Мин һинең үҙеңдең өҫтөңдән шикәйәт итермен.* И. Насыри.

**ШИҠАН** *с. һөйл.* **1.** Ҡыйшанларға яратҡан, ҡылансыҡ. *Шиҡан ир.*

**2.** *кусм.* Шаярыуға ҡоролған. *Шиҡан һүҙ. Шиҡан таҡмаҡ.*

**ШИҠАНЛАҠ** *с.* Күҙе-башы уйнаҡлап торған; ҡылансыҡ, ҡыйшаңлаҡ. *Шиҡанлаҡ кеше.* ■ *Ҡара, торған бер шиҡанлаҡ икән дәһә был Йәнбирҙе! Мәүлиханың .. бөйөрөнә төрткөләп ала.* В. Нафиков.

**ШИҠАНЛАУ** *к.* Кемгәләр оҡшарға, иғтибарын йәлеп итергә теләп ҡыланыу; ҡыйшанлау. *Шиҡанлап көлөү. Шиҡанлап һөйләшеү.*

**ШИҠМӘТҺЕҘ** *с. диал.* Шөҡәтһеҙ. *Шиҡмәтһеҙ әҙәм. // Шиҡмәтһеҙ күренеү.*

**ШИҠЫЛДАҠ** *и.* Оҙон аяҡлы, һор төҫлө, атаһының түше ҡыҙыллы-күкле һайрай торған ваҡ турғай. *Шиҡылдаҡ ояһы.*

**ШИҠЫМ** *и. иҫк.* Циркта мәрәкәләп, кәмит күрһәтеп йөрөгән артист; клоун.

**ШИЛЕ** *и. диал.* Шишмә, инеш.

**ШИЛЛИНГ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* **1.** Англияла 1971 йылға тиклем йөрөтөлгән фунт стерлингтың егерменән бер өлөшөнә тигеҙ аҡса берәмеге.

**2.** Австрияла, ҡайһы бер Африка илдәрендә аҡса берәмеге.

**ШИЛМА** [*рус.* шельма] *и. һөйл.* Хәйләкәр, мут кеше. / Әрләгәндә, орошҡанда әйтелә.— *Әллә һеҙ бынау баштан һыу инеп йөрөйһөгөҙмө тағы, шилмалар! Ҡарт малайҙарҙың ҡатып бөткән аяҡтарына ҡарап алды.* Р. Солтангәрәев.

**ШИМ** *р. диал.* **1.** Шау, гел. *Шим ирҙәр йыйылған. Ит шим май.* / Тос. *Ҡаҙ майы шим була.*

**2.** *с. мәғ.* Бысый (икмәккә ҡарата).

♦ **Шим бал** балауыҙынан айырылған, һитәһеҙ, шыйыҡ бал.

**ШИМАЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Төньяҡ. *Шимал еле.* ■ *Азияның шималының исеме Себер, кеше аҙ булһа ла, үҙе күп ер.* М. Ғафури.

**ШИМАЛИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Төньяҡҡа мөнәсәбәтле, төньяҡтағы. *Шимали Америка.*

**ШИМЛӘҮ** *к.* **1.** Ҡур өҫтәп, яңыртыу, емләү (балды, ҡымыҙҙы). *Шәкәр менән шимләү. Шимләп ҡуйыу.* ■ *[Әхмәдулла бабай:] — Бына бая .. колхоз йәйләүенән ҡымыҙ апҡайтҡайным, инәйең кәзә һөтө менән шимләп маташҡан.* Ә. Вахитов.

**2.** Бал ҡортона өҫтәмә шәкәр, бал биреп ашатыу.

**ШИМПАНЗЕ́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Экваториаль Африканың тропик урмандарында йәшәгән кешегә оҡшаш маймыл.

**ШИН** [*рус.* шина ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Һауа тултырылған камералы резина тәгәрмәс. *Тәгәрмәс шины. Шин заводы.*

**2.** *кар.* **талыҡ.** 2. *Ҡулға шин һалыу.* ■ *Шин башлыса аяҡ-ҡул һынғанда ҡулланыла. Шин урынына таҡта, фанера киҫәге, таяҡ та ҡулланырға мөмкин.* В. Ғүмәров.

**ШИНЕ́ЛЬ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Махсус фасон менән арттан склад һалып, биллек ҡуйып ҡалын буҫтауҙан тегелгән, хеҙмәт кешеләренең өҫ кейеме. *Һалдат шинеле. Тимер юлсылар шинеле.* ■ *Һоро шинель — түҙем шинель, ҡояштарҙа уңамы? Һоро шинель кейгән һалдат һалҡындарҙа туңамы?! Һалдат шинеле киймәгән .. егет егет буламы?* Ә. Атнабаев.

**ШИНШИЛЛА** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* **1.** Көньяҡ Америкала йәшәгән ялбыр оҙон ҡойроҡло, йылтыр һоро төҫтәге ҡиммәтле тиреле кимереүсе йәнлек һәм шул йәнлектең тиреһе.

**2.** Күкһел төҫтәге затлы тиреле йорт ҡуянының төрө.

**ШИҢДЕРЕҮ** *к.* **1.** Тереклек сифатын бөтөрөү, һулытыу (үҫемлектәргә ҡарата). *Гөлдө шиңде-*

*реү.* ■ *Препараттарҙың береһе ҡара һолоно шиңдерә, ҡорота, ә игенгә зарар итмәй.* «Совет Башҡортостаны», 1970, 5 май.

**2.** Күләмен кәметеү; кесерәйтеү. *Эсте шиңдереү. Туптың һауаһын сығарып шиңдереү.*

**ШИҢЕҮ** *ҡ.* **1.** Тереклек сифатын юғалтыу, һулыу (үҫемлектәргә ҡарата). *Шиңгән сәскә.* ■ *Тик терелмәй һыу һибеүҙән генә, шиңгән гөлгә һыуҙар файҙаһыҙ.* Ә. Вахитов. *Ер өҫтөндә бөтә нәмә шиңә ямғырһыҙ һәм күкрәү-йәшенһеҙ..* Н. Нәжми. / *күсм.* Көс-дәрте, ҡеҙрәте бөтөү; һүрелеү, һүнеү. *Шиңмәҫ йәшлек.* ■ *Мин ҡурҡтым, юғалтам, тип һине, йөрәк ҡуйһа шиңеп.* М. Кәрим.

**2.** Күләме кәмеү, кесерәйтеү. *Кәбән шиңгән. Майы шиңгән.* ■ *Тулған ҡарын ҡарыны шиңә төшһөн самалап.* Ш. Бабич. *Юлайҙың был ялҡынлы һүҙҙәренән һуң Ғариф үҙен .. шиңеп ҡалған кеүек һиҙҙе.* З. Биишева.

**ШИПАН** *с. диал.* Хәйләкәр, мут. *Шипан кеше.*

**ШИПАТАЙ** *и. һөйл.* Өй эсендә кейә торған йомшаҡ еңел аяҡ кейеме. *Күн шипатай. Шипатай кейеү.*

**ШИПКЕРТ** *и.* **1.** Саҡ ҡына ишетелгән тауыш; шеп-шикерт. *Шипкерт биреү.* ■ *Оҫта баҫып аяғын, бик ныҡ асып ҡабағын, шипкерт һиҙеп бара яға туҡтап-тыңлап ал ағын.* Х. Ғәбитов. / *күсм. һөйл.* Кешегә билдәһеҙ йәшерен эш. *Бер шипкерте бар быының.*

**2.** *р. мәғ.* Шым ғына, һиҙҙермәйенсә. *Ҡара төн үтәләй шипкерт кенә килгән бер шәүлә.* М. Тажи. / Саҡ ҡына, һис тә. *Йәнбикә өйгә ингәнде шипкерт белдермәне.* Ғ. Дәүләтшин.

**ШИПКӘН** *и.* Әүернә сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған ваҡ ҡына һары орлоҡло, ҡыҫҡа һабаҡлы бер йыллыҡ үлән (ҡырҙа, иген араһында үҫә, орлоғонан май алалар). *Баҫыу шипкәне. Ҡыр шипкәне. Шипкән майы.* ■ *Ялан ғына ерҙең ай шипкәнен, елдәр түгә уның кипкәнен* (Халыҡ йырынан).

**ШИПКӘРТЕҮ** *ҡ. диал.* Нимәләр тураһында белдереү, иҫкәртеү. *Эт өрөп шипкәртә.*

**ШИПТЫРЫУ** *ҡ. диал.* Сыптырыу. *[Хәҙисә — Зөфәргә:] Мин атайың урынында булһам, һине сырылдатып, тызылдатып тал сыбығы менән шыптырып ҡайтарыр инем.* С. Кулибай.

**ШИПШӘ** *и. диал.* Шипкән. *Шипшә орлоғо.*

**ШИПЫМ** *и. диал.* Сарыҡ. *Ҡайыулы шипым. Шипым кейеү.*

**ШИРКҮН** *и. диал.* Бәләкәй ҡыңғырау, сыңғырлаҡ.

**ШИРКӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ижтимағи ойошма; йәмғиәт. *Ширкәт төҙөү. Бер ширкәт кешеләре. Сауҙа ширкәте.* ■ *Бына беҙҙең ауыл халҡы өс-дүрт йыл буйына бергәләп ер эшләү ширкәтендә эшләп килде.* Б. Хәсән. *Гәүһәр ауыл комсомолецтары менән бергә кулактарҙың йәшергән игендәрен табышты. Ярлыларга ерҙе бергәләп эшкәртеү ширкәте ойошторошто.* И. Ғиззәтуллин.

**ШИРКӘТСЕ** *и. иҫк. кит.* Ниндәйҙер бер ширкәт ағзаһы.

**ШИРЛЕК** *и.* **1.** Оҙон таҡтанан ултырыу өсөн эшләнгән йорт ҡаралдыһы, эскәмйә. *Киң ширлек. Ширлек тояғы.* ■ *[Мөхәмәтулла ҡарт] ҡапҡа төбөндәге ширлеккә ултырҙы ла ауыр, бик ауыр итеп көрһөндө.* Ә. Вахитов.

**2.** *диал.* Урындыҡ йөҙлөгө.

**3.** *диал.* Тәҙрә төбө. *Ширлек тулы гөл.*

**ШИРЛӘҮ** *ҡ. иҫк.* Ҡайғылы йыр йырлау. *[Йырсы:] Күпте күргән ҡарыйың мин, .. асмандағы турғайҙай, алдығыҙҙа ширләйем.* «Буҙйегет».

**ШИРМА** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* **1.** Рамға тарттырып эшләнгән йыйылмалы шаршау. *Ширма ҡуйыу. Ширма менән ышыҡлау. Ширма менән бүлеү.*

**2.** *күсм.* Кемгәләр һүҙ тейҙермәү өсөн ышыҡ булып йөрөгән кеше. *Ширма булып йөрөү.*

**ШИҮӘ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Урындағы һөйләш; диалект.

**ШИФА** [*ғәр.*] *и.* Һаулыҡ, сәләмәтлек өсөн файҙалы тәьҫир; сихәт. *Шифа булыу. Шифаһы тейеү.* ■ *[Төлкө:] Мин үҙем дә шифалы бер үлән беләм, сирләгәндә шифа таптым шуның менән.* С. Ҡудаш. / Нимәнәндер йәм табыуға, ләззәт алыуға ҡарата. *Исеме Зифа икән дә, буйы ла зифа икән. Бер йылмайып ҡарауҙары күңелгә шифа икән!* Н. Нәжми.

**ШИФАЛАУ** *ҡ. һөйл.* Ауырыуҙан ҡотолоу, һауығыу өсөн дауа биреү; дауалау. *[Ялсы:] Батшаның ҡыҙы сирләй, бик күп төрлө дарыуҙар менән шифалап ҡаранылар, бер дарыу ҙа килешмәне* (Әкиәттән).

**ШИФАЛЫ** *с.* **1.** Һаулыҡ, сәләмәтлек өсөн файҙалы; сихәтле. *Шифалы дарыу. Шифалы булыу.* // *Шифалы тойолоу.* ■ *Даланың саф һауаһы шифалы тәьҫир иттеме — ярһыған йөрәгем апаруҡ баҫылғайны.* Ә. Хәкимов. *Һыуҙа ҡойоноу бигерәк тә шифалы: тәндә ҡан йөрөшө, матдә алмашыныуы яҡшыра.* В. Ғүмәров. / Дауалай торған сифаты булған. *Шифалы ләм. Шифалы һыу. Шифалы үлән.* ■ *Тоҙло күлдәр Башҡортостанда аҙ, ә инде Мулдаҡ кеүек шифалы, ләмгә бай күлдәр бөтөнләй юҡ тиһәк тә хата булмаҫ.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 13 апрель.

**2.** *күсм.* Һәйбәт тәьҫир иткән; файҙалы. *Шифалы ямғыр.* ■ *Ә ниндәй шифалы дымдар бөркөлә шишмәләрҙән!* М. Кәрим.

**ШИФАХАНА** [*ғәр.* + *фарс.*] *и. иҫк. кит.* Ятып дауалана торған махсус бина; больница. *Шифаханала ятыу.*

**ШИФЕР** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* **1.** Ҡара йәки буҙ төҫтәге балсыҡлы сланец.

**2.** Шул сланецтан йәки асбеслы цементтан һырлап яһаған түбә ябыуы. *Һарайҙы шифер менән ябыу.* ■ *Йорттарҙың стеналары ғына түгел, бәлки шифер менән ябылған түбәләре лә күкһел аҡ булып йылтырап күренә.* Ә. Вәли.

**ШИФЕРЛЫ** *с.* Шифер (2 мәғ.) менән ябылған. *Шиферлы түбә.*

**ШИФО́Н** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Нык йоҡа ебәк кизе-мамыҡ туҡыма. *Аҡ шифон. Биҙәкле шифон.* // *Шифон күлдәк. Шифон яулыҡ.*

**ШИФОНЬЕ́Р** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Кейем-һалым өсөн тәғәйенләнгән, ҙур булмаған шкаф; гардероб. *Ике ишекле шифоньер. Шифоньер тартмаһы. Шифоньер аскысы.*

**ШИФР** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Йәшерен яҙыу өсөн ҡулланылған шартлы хәрефтәр системаһы. *Шифр менән яҙыу. Шифрға һалыу.* ■ *Эфирга бирелгән текст яҙып алынған булһа ла тиҙ арала*

*ғына уның шифрын асырға мөмкин булманы.* Ф. Лоҡманов.

**2.** Торған урынын күрһәтеү өсөн китап, ҡулъяҙма, документ кеүек нәмәләргә ҡуйылған билдә, тамға. *Шифр ҡуйыу. Шифрһыҙ китап.*

**ШИФРЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **шифрлау.** *Шифрланған телеграмма.*

**ШИФРЛАУ** *к.* Шифр (1 мәғ.) менән яҙыу; шифрға һалыу. *Тексты шифрлау. Шифрлап биреү.*

**ШИФРЛАУСЫ** *и.* Шифрға (1 мәғ.) һалыусы.

**ШИФРО́ВКА** [*рус.*] *и.* **1.** Шифрға һалыу эше. *Шифровка менән шөғөлләнеү.*

**2.** *һөйл.* Шифрланған текст (телеграмма, хат һ. б.).

**ШИХА́Н** [*рус.*] *и.* Осло башлы суҡаҡ тау. *Шихан битләүе. Шихан итәге.* ■ *Шыйыҡ томан аша ялан ғас һырттарын тырпайтып Стәрлетамаҡ эргәһендәге атаҡлы шихандар теҙмәһе лә бер-бер артлы .. күренә башланы.* Д. Исламов.

**ШИ́ХТА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. махс.* Металл иретеүгә йәки химик эшкәртеүгә тәғәйенләнгән ташкүмер, металл һ. б. ҡушылмаһы. *Шихта ташыу. Шихта тейәү.*

**ШИҺАҠА: шиһаҡа бураны** *диал.* аҡман-тоҡман.

**ШИШАРА** *и. диал. ҡар.* **бауырһаҡ**[1]. *Шишара бешереү.*

**ШИШМӘ** [*фарс.*] *и.* Ер аҫтынан урғылып сығып ятҡан һыу; инеш. *Һалҡын шишмә. Тау шишмәһе. Шишмә һыуы. Шишмә башы.* ■ *Таштар ярып көмөш шишмә аға, ҡыш та туңмай, йәй ҙә йылынмай.* С. Кулибай. / *күсм.* Берәй нәмәнең сығанағы. *Моң шишмәһе. Илһам шишмәһе.*

**ШИШМӘЛЕК** *и.* Шишмә сығып ятҡан урын. *Тау итәкәйҙәре шишмәлек. Һыуһындарың баҫыр эсмәлек.* Т. Ҡарамышева.

**ШИШТАУ** [*рус.* шест] *и. диал.* Оҙон ныҡ таяҡ, һайғау (ғәҙәттә кәмәлә йөрөгәндә этеү өсөн ҡулланыла). *Шиштау менән этеү.* ■ *Һыу ситенә еткәс, Алһыу шиштау итеп ҡулына нык ҡына бер таяҡ алды ла элекке шуҡлығы менән боҙ өҫтөнә һикерҙе.* Ғ. Ибраһимов.

**ШИШӘМБЕ** [*фарс.*] *и.* Аҙнаның икенсе көнө. *Шишәмбе көн.*

**ШКАЛА́** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Төрлө приборҙарҙағы һыҙыҡтар менән билдәләнгән линейка йәки циферблат. *Термометр шкалаһы. Радиоалғыс шкалаһы.*

**2.** Ниндәйҙер бер дәүмәлде билдәләү йәки баһалау өсөн ҡабул ителгән һандар системаһы. *Эш хаҡы шкалаһы.*

**ШКА́ЛИК** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. һөйл.* 0,06 литрға торошло эсемлек үлсәү берәмеге. / Шул күләмдәге араҡы һалынған шешә. *Нурғәли ағай һәр баҙар көнө берәр шкаликты төшөрөп алырға яратһа ла, ғөмүмән, эсмәй ҙә эскеселәр менән аралашмай ҙа торғайны.* С. Кулибай.

**ШКАТУ́ЛКА** [*рус.* ⟨ *пол.*] Затлы нәмәләр һала торған ҡумта.

**ШКАФ** [*рус.*] *и.* Эсенә төрлө нәмә ҡуйыу өсөн кәштәләп эшләнгән асылып-ябылмалы ҡаралды. *Быяла ишекле шкаф. Китап шкафы. Кейем шкафы. Һауыт-һаба шкафы. Шкаф кәштәһе. Шкаф башы.* ■ *Алдымда бер нисә шкаф, шкафтарға ыҫпайлап теҙелгән китап .. төптәре алтын-көмөш менән биҙәлгән.* Ғ. Ғүмәр.

**ШКВАЛ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Бик көслө елдең кинәт килеп һыҙыра һуғыуы. *Шквал ваҡытында ярһыулы ҙур тулҡындар ҡаялы ярҙарға ҡот осҡос көс менән бәрелеп, уларҙы емерә.* Ә. Бикчәнтәев. / *күсм.* Көслө атыш; ут ҡойоно. *Гитлерсылар ергә яттылар. Шуны ғына көткән офицерҙар, шквал, ут асып «ура» ҡысҡырып, дошмандың флангыһынан һәм тылынан атакаға күтәрелделәр.* Ә. Ихсан.

**ШКИВ** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Көс тапшырыу ҡайышын хәрәкәткә килтерә торған тәгәрмәс.

**ШКИ́ПЕР** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* **1.** Үҙ двигателе булмаған тағылма йылға карабының командиры. *Шкипер вазифаһы. Баржа шкиперы.*

**2.** *иҫк.* Диңгеҙ карабында палуба йыһаҙы өсөн яуаплы кеше.

**ШЛАГБА́УМ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Тимер юл аша сыҡҡан йәки заставаға ингән юлға арҡыры ҡуйыла торған күтәрмәле кәртә. *Асыҡ шлагбаум. Шлагбаумды ябыу.* ■ *Тауар поезы ер тетрәтеп үткәс кенә шлагбаум күтәрелде.* Р. Низамов.

**ШЛАК** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Иреү процесында металл өҫтөн ҡаплап, уны мейестәге газдан һаҡлаған көл һәм флюс ҡатышмаһынан торған шыйыҡ йәки ҡатып алған масса.

**2.** Ҡаты яғыулыҡ, күмер яҡҡандан ҡалған ҡалдыҡ. *Уттар бөркөп гора [домна], ут шлактар шаулап ағалар.* Ә. Салих. *Отпускыһы бөтөүгә минең күрше тактанан ҡыуыш стена яһап сыҡты. Араһына шлак тултырҙы. Түбәһен шифр менән ябырға ла өлгөрҙө.* Д. Исламов.

**ШЛАКОБЕТО́Н** [*рус.*] *и.* Шлак, ҡом һәм цемент ҡатыштырып эшләнгән еңел бетон. *Төҙөлештә шлакобетон ҡулланыу.* // *Шлакобетон панель.*

**ШЛАНГ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Һыу, газ һ. б. нәмә ҡыуыу өсөн ҡулланылған резина һ. б. көпшә; эсәк. *Пожар шлангыһы. Шланг менән һыу һиптереү.* ■ *Бакты шлангынан килгән ҡайнар һыу менән бешекләп, һеперткеләр менән ышҡый-ышҡый йыуҙылар.* Ә. Байрамов.

**ШЛЕЙФ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ҡатын-ҡыҙ күлдәгенең арттан һөйрәлдереп теккән итәк осо. *Шлейфлы күлдәк.*

**ШЛЕЙӘ** *и. ҡар.* **ышлыя.**

**ШЛЕМ** [*рус.*] *и.* **1.** Башты бәрелеү, һуғылыуҙан һаҡлар өсөн хеҙмәт иткән махсус баш кейеме. *Танкист шлемы. Мотоциклист шлемы.*

**2.** Тәүге дәүерҙә Ҡыҙыл Армияға хәрби форма итеп индерелгән махсус баш кейеме.

**3.** *ҡар.* **торҡа.**

**ШЛЕМОФО́Н** [*рус.*] *и.* Осоусылар, танкистар кейә торған тауыш алғыс ҡуйылған шлем һәм тауыш алғыстың үҙе. *Шлемофон кейеү.*

**ШЛЁНКА** [*рус.*] *и. һөйл.* Меринос тоҡомло һарыҡ йөнө.

**ШЛИФ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. геол.* Микроскоптан ҡарап тикшереү өсөн бик йоҡа итеп телеп шымартылған минерал йәки берәй төрлө тау тоҡомо киҫәге.

**ШЛИХ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. тау* Ҡом һәм йомшаҡ тау тоҡомдарын йыуғанда төпкә ултырған, удель

ауырлығы ҙур булған минерал киҫәктәренән торған ҡалдыҡ.

**ШЛЮЗ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Һыу кимәле төрлөсә булған йылға һәм каналдарҙың ҡушылған урынына эшләнгән карантарҙы үткәрә торған гидротехник ҡоролма. *Бер камералы шлюз. Күп камералы шлюз.* ■ *Павловка ГЭС-ында пароходтарҙы үткәреү өсөн тәғәйенләнгән шлюздар бер нисә һикәлтәнән тора.* М. Хисмәтов.

**2.** Быуа ҡапҡаһы.

**3.** *тау* Ваҡланған руданы йәки алтынға бай ҡомдо йыуа торған ауыш киң улаҡ рәүешендәге ҡулайлама.

**ШЛЯ́ХТА** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и. тар.* Үҙәк Көнбайыштағы ҡайһы бер илдәрҙә (Польша, Литва һ. б.) хаким итеүсе синыф кешеһе.

**ШЛЯ́ХТИЧ** [*рус.* ⟨ *пол.*] *и. тар.* Польшала ваҡ дворянин.

**ШНИ́ЦЕЛЬ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Тапаған йәки төйөлгән иттән бешергән йоҡа котлет. *Һыйыр итенән бешерелгән шницель. Шницель бешереү.*

**ШНУР** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Үреп, ишеп эшләнгән нәҙек бәй; бау. *Ботинка шнуры. Шнур үткәреү.*

**2.** Электр сымы. *Телефон шнуры. Шнур һуҙыу.*

**ШОБАҒА** *и. диал.* Шыбаға.

**ШОБОР** *окш.* Ҡойолоп торған һыу тауышын белдергән һүҙ. *Шобор итеү. Шобор иткән тауыш.*

**ШОБОРЛАТЫУ** *ҡ.* Шобор-шобор иттереү; шобор-шобор килтереү. *Шоборлатып эсеү.* ■ *Шәүлиә Ғәниҙең һүҙен тыңламаны. Сәйнүктәге һыуҙы шоборлатып биҙрәгә түкте.* Р. Низамов.

**ШОБОРЛАУ** *ҡ.* Шобор-шобор итеү, шобор-шобор килеү. *Шоборлап ҡойолоу. Шоборлап аҡҡан һыу.*

**ШОБОР-ШОБОР** *окш.* Ҡабат-ҡабат шобор иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шобор-шобор итеү. Шобор-шобор килеү. Шобор-шобор иткән тауыш.*

**ШОВИНИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Милләтселектең бер милләтте икенсеһенән өҫтөн ҡуйыуға, милләттәр араһында дошманлыҡ һәм күрә алмаусылыҡ идеяларын таратыусы иң агрессив формаһы. *Бөйөк дәүләтселек шовинизмы.*

**ШОВИНИ́СТ** [*рус.*] *и.* Шовинизм яҡлы кеше. *Шовинист булыу.*

**ШОВИНИСТИК** *с.* Шовинизмға мөнәсәбәтле. *Шовинистик ҡараш.*

**ШОЙҠАН** *и.* **1.** Берәй эш-хәлдең ниндәйҙер һөҙөмтә биргән тәьҫире; шауҡым. *Шул йылдарҙың шойҡаны хәҙер килеп сыға бына. Шулай булмаһа, ҡырҡ алты йәшемдә йөрәк ауырыулы булыр инемме ни мин.* Н. Мусин.

**2.** Ниндәйҙер йоғонто, тәьҫирҙән килгән зыян, зарар. *Шойҡан һалыу. Шойҡанһыҙ булыу.* ■ *Дошман шойҡан ҡылғанда, илгә терәк булырлыҡ яуыздарҙы һемәйтеп, муйынын бороп ҡуйырлыҡ батырҙарым бар минең.* А. Игебаев. **Шойҡаны тейеү** кемгәлер насар йоғонто яһау.

**ШОК** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. мед.* Ҙур психик кисереш ауырлығына, төрлө физик имгәнеүгә, ныҡ ауыртыуға реакция рәүешендә кеше организмында барлыҡҡа килгән, үлем ҡурҡынысы булған хәл; бөйлән. *Шок булыу. Шок хәлендә ятыу.*

**ШОКОЛА́Д** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и.* **1.** Какаоға шәкәр һәм башҡа тәм-том ҡушып яһаған онтаҡ йәки масса. *Шоколад онтағы.* / Шул массанан әҙерләнгән конфет йәки плитка рәүешендәге кондитер изделиеһы.

**2.** Шул онтаҡ һалып ҡайнатҡан эсемлек. *Шоколад эсеү.*

**ШОКОЛАДЛЫ** *с.* Шоколад ҡушылған. *Шоколадлы торт.*

**ШОҠОМҺОҘ** *с. диал. ҡар.* **шөкәтһеҙ** 1. *Шоҡомһоҙ булыу.*

**ШОҠРАЙЫУ** *ҡ.* Кәүҙәне, аяҡ-ҡулды йыйып, йомарланыу; бөршәйеү. *Шоҡрайып ултырыу.* ■ *Ғиндулла ямғыр аҫтында күшеккән тауыҡтай шоҡрайып, ҡапыл шымды.* Ш. Янбаев.

**ШОҠРАЙЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **шоҡрайыу.** *Аслы-туҡлы уҡыусыларҙың шоҡрайышып ултырыуына ҡарайһың да, йөрәгең һыҙлай.* «Ағиҙел», 1967, № 11.

**ШОМ**[1] *и.* **1.** Күңел тыныслығын боҙған, ҡурҡыу тойғоһо уятҡан нәмә; хәүеф. *Күңелгә шом һалыу.* ■ *Бик ҙур шом һиҙеп, Садрисламдың тәндәре эҫеле-һыуыҡлы булып китте.* Ф. Иҫәнғолов. *Ҡарт үҙе юҡ булды ла ҡуйҙы, ти. Был егеткә шом төшә хәҙер* (Әкиәттән).

**2.** Бәлә-ҡаза килтергән ҡурҡыныс нәмә, дәһшәт. *Йыландай шыуышҡан фашистың шом сәскән, шымарған юлын киҫ!* С. Ҡудаш.

**3.** Аҫтыртын яуызлыҡ; шомлоҡ. *Ҡарағөлөмбәттең күҙенә ҡан һауып, асыуланып килгәнен халыҡ күреп: «Зинһар, батыр, ҡаршы тор. Булмаһа, ул һеҙгә бер шом уйлап килә»,— тине.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ШОМ**[2] *с. диал.* Шомбай.

**ШОМАҠА** *с. диал.* Аҫтыртын уҫал. *Шомаҡа кеше.*

**ШОМАН** *и. диал.* Шүмән.

**ШОМБАЙ** *с.* Аҫтыртын ғына үҙенекен эшләп йөрөүсән; аҫтыртын уҫал. *Шомбай кеше.* / Ҡырыҫ тәбиғәтле, томһа. *[Гөлниса] Минең килбәтһеҙлектән, ҡаушауҙан көлә: — Эй ҡырағай! Шомбай! — ти.* З. Биишева.

**ШОМБОР** *окш.* Һыуға ҡапыл ауыр нәмә төшкәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шомбор итеп ҡалыу.*

**ШОМБОРЛАУ** *ҡ.* Шомбор иткән тауыш сығарыу. *Шомборлап төшөп китеү.* ■ *Арыҫлан ҡотоноп үкерә башланы, ти. «Дөмөктөрәйем әле быны», тип гәйрәтләнеп, ҡойо эсенә һикерҙе лә шунда шомборлап батты ла үлде, ти* (Әкиәттән).

**ШОМБОЯ** *и.* Ҡайһы бер ҡырағай һәм культуралы үҫемлектәрҙең тамырына йәбешеп, уларҙың һуты менән аҙыҡлана торған төҫһеҙ паразит үҫемлек. *Көнбағыш шомбояһы.* ■ *Ана кесерткәнгә сырмалған шомбояны ғына ҡара. Ул да, ерҙә бер генә тамыры булмаһа ла, бүй үҫтерә.* Р. Ғабдрахманов.

**ШОМЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Шомға[1] (1 мәғ.) һалыу, шом уятыу. *Ил сигендә шулай инде ул һәр сокор, ҡалҡыулыҡ үҙенсә сер һаклай, елдә тирбәлеп киткән ағас ботаҡтары ла шомландырып, күңелгә шик һал[а].* Д. Бүләков.

**ШОМЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Күңелдә шом[1] (1 мәғ.) уяныу, ҡурҡыуға ҡалыу, хәүефләнеү. *Ихласым юҡ, баҫмай аяҡ, йөрөмәй ҡул; әллә ниҙән шиклә-*

*нәм һәм шомланам.* Ш. Бабич. *Йылға буйындағы упҡынлы соҡорҙар борон был тирәлә йәшәгән башҡорттар күңелендә ҙур шомланыу тыуҙырған, шуға улар йылға менән күлде «шайтан» һәм «убыр» тип атаған.* Д. Бураҡаев. / Ҡурҡып һағайыу. *Ат ҡолаҡтарын ҡайсылатып, шомланып, тибенде, ашауҙан туҡтаны. Ул нимәнелер һиҙенә ине.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Шик-шөбһә уятыу; шикләнеү. *Беҙҙән алыҫ түгел бер өҫтәлдә ултырған ике татарҙан Туҡай ниңәлер шомланды: «Былар тиктәҫ кешеләр булмаҫҡа кәрәк, ҡарауҙары шуны белдерә. Бынан китәйек»,— тине.* М. Ғафури.

**ШОМЛО** *с.* **1.** Күңелгә шом һалған, хәүеф-хәтәрле, ҡурҡыныс. *Шомло төн. Шомло тынлыҡ.* ■ *Заман шомло. Ҡаҡшап куя ғәләмде тотҡан терәк. Хужа түгел, был йыһанға тоғро һаҡсылар кәрәк.* М. Кәрим.

**2.** Шом белдергән, ҡурҡып хәүефләнгән; хафалы. *Шомло тауыш. Шомло хәбәр.* ■ *Минең күңелгә бер шомло уй килде: үлгән кешенең нәмәһен алһаң .. ул кеше һуғыштан иҫән сыҡмай, тиҙәр һалдаттар.* Д. Юлтый.

**ШОМЛОҠ** *и.* **1.** Ҡасан да булһа зыяны тейә торған яҙыҡ эш. *Беҙ, балалар, ерһеҙ ҡалдыҡ бөгөн ятып, ниндәй шомлоҡ быға сәбәп булды икән?* (Бәйеттән). / Ошондай эштең шауҡымы һәм шуның һөҙөмтәһе рәүешендә килгән бәхетһеҙлек; бәлә-ҡаза. *Урлаған тауар алып өҫкә кейер хәл юҡ, барыбер уның шомлоғо булмай ҡалмай.* А. Таһиров.

**2.** Нимәнәндер хәүефләнгән ҡурҡыу тойғоһо; шом. *Айбулатҡа был ғәүләү шул тиклем күңелһеҙ тойолдо, бәхетһеҙлек хәбәре булып, күңеленә шомлоҡ һалды.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Аҫтыртын яуызлыҡ; шом. *Шомлоҡ уйлау. Шомлоҡ менән йөрөү.* ■ *Ҡыпсаҡтарҙың намыҫлы бер батыры ине. Мәсем хандың шомлоғонан үлеп ҡалды.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

♦ **Гөнаһ шомлоғо** *ҡар.* **гөнаһ.**

**ШОМОРТ** *и. диал.* Муйыл. *Кипкән шоморт. Шоморт сәскәһе.* ■ *Баҡсабыҙҙа бар: сейә, алма, шоморт ағастары, ҡып-ҡыҙыл булып тора һалыныл миләш тәлгәштәре.* Ш. Бабич.

♦ **Шоморт ҡара** бик ныҡ ҡара; ҡап-ҡара; сөм ҡара. *Шоморт ҡара күҙ.*

**ШОМОРТЛАНЫУ** *диал.* Муйылланыу.

**ШО́МПОЛ** [*рус.* ‹ *нем.*] *и. ҡар.* **шып** 1. *Мылтыҡтарҙы таҙартыуға шомпол юҡ, май юҡ. Шул арҡала күп мылтыҡтар окоп башына ташлана.* Д. Юлтый.

**ШОМПОЛЛАУ** *к.* Шомпол менән һуҡтырыу. *[Ғосман:] Ғәлим ағай, аҡрын, минең арҡаның һаулығы юҡ. — Ни эшләп? — Шомполланылар.* С. Ханов.

**ШОМРАЙЫУ** *к. диал.* Ҡолағын артҡа йығып һағайыу (атҡа ҡарата). *[Рәхмәй:] — Ана арыраҡ торғаны ла ҡолаһың балаһы. Ә ул төптө дураҡ, бер ҙә кешене танымай. Егә башланыңмы, һиңә шомрайып ҡарай.* Ғ. Ғүмәр.

**ШОҢҠАР** *и.* **1.** Ылаҫындар ғаиләһенә ҡараған күкшел буҙ йәки аҡ төҫтәге, ҡарғанан ҙур йыртҡыс ата ҡош. *Аҡ шоңҡар. Күк шоңҡар. Шоңҡар сөйөү.* ■ *Юлдыҡай яурынына аҡ шоңҡарын ултыртып өйгә инә, Ҡарасәс ҡаршы алып күре-шә.* Х. Ғәбитов. *[Егет] башҡорт ғәҙәте буйынса бәләкәйҙән йылҡы әйҙәр, һунарға йөрөр, шоңҡар сөйөр, уҡ юныр .. булған.* Ә. Вахитов.

**2.** *күсм.* Ғәйрәтле, батыр ирга ҡарата. *Алмас ҡылыс һелтәп ир шоңҡары аждаһаға сапты ялҡынды.* Х. Ғәбитов.

● *Ҡарға маҡтанып шоңҡар булмаҫ, ишәк маҡтанып толпар булмаҫ.* Мәҡәл. *Ҡыяғы бөтөн шоңҡар юҡ.* Мәҡәл. *Мең араһынан толпар сығыр, йөҙ араһынан шоңҡар сығыр.* Мәҡәл. *Толпарҙан тояҡ ҡалыр шоңҡарҙан ҡыяҡ ҡалыр.* Әйтем.

**ШОПОРЛАТЫУ** *к.* Шопор-шопор иттереү; шопор-шопор килетерү. *Шопорлатып эсеү.*

**ШОПОРЛАУ** *к.* Шопор-шопор итеү, шопор-шопор килеү.

**ШОПОР-ШОПОР** *оҡш.* Ныҡ тартып, һемереп эскәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шопор-шопор итеү. Шопор-шопор сәй эсеү.*

**ШОР** *с.* Россияның Кемерово өлкәһендә йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (төрки телдәренең береһендә һөйләшә). *Шор халҡы. Шор ҡатыны. Шор теле.*

**ШОРҠОЛДАУ** *к. ҡар.* **шурҡылдау.**

**ШОРҠ-ШОРҠ** *оҡш. ҡар.* **шурҡ-шурҡ.**

**ШОРОЛДАТЫУ** *к. һөйл.* Шор-шор итеү. *Танауы шоролдап тора.*

**ШОРПОЛДАТЫУ** *к.* Шорп-шорп иттереү; шорп-шорп килтереү. *Ул Ғәфүр байға сәләм бирҙе. Бай тура ҡарамай ғына уның сәләмен кире ҡайтарҙы ла шорполдатып сәйен эсә башланы.* И. Көсәпҡол.

**ШОРПОЛДАУ** *к.* Шорп-шорп итеү, шорп-шорп килеү.

**ШОРП-ШОРП, шорп та шорп** *оҡш.* **1.** Шыйыҡсаны һемереп йотҡанда сыҡҡан өҙөк-өҙөк тауышты белдергән һүҙ.

**2.** Ҙур аяҡ кейемен һөйрәп атлағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шорп-шорп килеү. Шорп-шорп атлау.*

**ШОР-ШОР, шор ҙа шор** *оҡш. һөйл.* Күп итеп һемереп эскәндә йәки ныҡ итеп танау тартҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шор-шор итеү. Танауҙы шор ҙа шор тартыу.*

**ШОССЕ́** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Таш, асфальт йәки бетон түшәлгән юл; таш юл. *Бетон шоссе.* // *Шоссе юл.* ■ *Ҙур техника ҡорамалдарын, төҙөлөш материалдарын өҙлөкһөҙ ташыу мөмкин булһын өсөн.. Ағиҙел аша тимер-бетон күпер, Нөгөшкә саҡлы шоссе юл һалынды.* Ғ. Дәүләтов.

**ШОТЛАНД** *и.* Шотландияның һәм уға тоташҡан утрауҙарҙың төп халҡы һәм шул халыҡтың бер кешеһе (кельт телдәренең береһендә һөйләшә). *Шотланд халҡы. Шотланд ҡатыны. Шотланд теле.*

**ШОТЛА́НДКА** [*рус.*] *и.* Йөндән, ебәктән шулай уҡ мамыҡтан һуғылған шаҡмаҡлы туҡыма. // *Шотландка күлдәк. Шотландка тауар.*

**ШОФЁР** [*рус.* ‹ *фр.*] *и.* Автомобиль йөрөтөүсе. *Шофёр булыу.* ■ *Ғәлиҙең атаһы шофёр — ҙур автобус йөрөтә, ултыртып кешеләрҙе ул эшкә, йомошҡа илтә.* С. Ҡудаш.

**ШОФЁРЛЫҠ** *и.* Шофёр һөнәре. *Шофёрлыҡҡа уҡыу. Шофёрлыҡҡа өйрәнеү.* ■ *[Тәлғәт:] Мин*

*шофёр булам. Ана Исмай ағай һымаҡ. Нефть промыслаһына барам да шоферлыҡҡа өйрәнәм.* В. Исхаҡов.

**ШӨБӨР** *окш. ҡар.* **сөбөр.**

**ШӨБӨРЛӘҮ** *ҡ. ҡар.* **сөбөрләү.** *Йәше шөбөрләп ага.*

**ШӨБҺӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кем йәки нимәгәлер ышаныып етмәй, дөрөҫлөгөнә икеләнеү тойғоһо; шик. *Шөбһәгә алыу. Шөбһәгә төшөү. Шөбһә менән ҡарау.* ■ *Ерҙең ҡатылығына .. шөбһә ҡалмағас, торҙом, аяҡҡа баҫтым.* Д. Юлтый.

**2.** Хәүефләнеп ҡурҡыу хисе; шом. *Шөбһә һалыу.* ■ *Бына һәр бер көнө мең төрлө шөбһә, шик һәм көтөү .. менән тулы булған ауыр һуғыш йылдары артта ҡалды.* Ә. Вәли.

**ШӨБҺӘЛЕ** *с.* Шик-шөбһә уятҡан; шикле, ышаныһыҙ. *Шөбһәле кеше. Шөбһәле һүҙ.* / Шик, шөбһә белдергән; шикле. *Шөбһәле ҡараш. Шөбһәле уйҙар.*

**2.** Күңелдә шом, хәүеф уятҡан; шомло, хәтәр. *Шөбһәле тынлыҡ.* ■ *Ҡисҡә ҡарай ҡалаған тағы яңы хәбәрҙәр өҫтәлде. Халыҡ күңелендәге шөбһәле төйөндәр сиселә төштө.* Д. Юлтый.

**ШӨБҺӘЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Шөбһәгә төшөрөү, шөбһәгә һалыу; шикләндереү. *Шөбһәләндергән ваҡиға.*

**ШӨБҺӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Кем йәки нимәгәлер ышаныып етмәй шик менән ҡарау; шикләнеү. *Әүлиә карт юраған ҡыйынлыҡтарға юлыҡмағас, ул әйткән һүҙҙәргә шөбһәләнеп тә ҡуя былар.* «Алдар менән Зөһрә».

**2.** Хәүеф һиҙеп бер аҙ ҡурҡа биреп ҡуйыу, шомланыу; шөрләү. *Мин генә түгел, егеттәр ҙә шөбһәләнде, айыу-фәлән осрау ихтималын һөйләй башланы.* М. Ғафури.

**ШӨҒБӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит. ҡар.* **бүлек** 4. *Мәғариф шөғбәһе.* ■ *Бер ваҡыт сәғәт өстәрҙә нәшриәт шөғбәһендә эшләп ултырғанда, һеҙҙе бер йәш егет һорай, тинеләр.* М. Ғафури.

**ШӨҒЛӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Йылы нур, ялҡын. *Ут шөғләһе. Көн шөғләһе.* / Яҡты нур, яҡтылыҡ. *Алтын шөғләһе.* ■ *Шөғләләр уйнай күгемдә, ал, ҡыҙыл нурҙар теҙә.* Б. Мирзанов.

**ШӨҒӨЛ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Башҡарған, мәшғүл булған эш, хеҙмәт. *Умартасылыҡ шөғөлө. Үҙеңә шөғөл табыу.* ■ *Бәрҙе тотоуҙан да күңеллерәк шөғөл бармы икән?* Ф. Иҫәнғолов. *Юлдаш .. итек табанына йәбешкән мәтене бысаҡ менән ҡырып ташланы. Ошо шөғөлөнән туҡтамай ғына: — Ҡайһы бригаданан? — тип һораны.* Ә. Хәкимов.

**2.** Һәр төрлө ваҡ-төйәк эш; мәшәҡәт. *[Хисаметдин Аллаярға:] Донъяуи шөғөлдәрегеҙ ихтыяр ҡуйған тәкдирҙә әҙерәк һөйләшеп ултырыр инек.* Ф. Иҫәнғолов.

□ **Шөғөл итеү** (*йәки* **ҡылыу**) шөғөлләнеү, мәшғүл булыу. *Игенселек менән шөғөл итеү.* ■ *Хөрмәт итеү кәрәк булған мәллә ире шөғөл иткән һөнәрҙе?* М. Кәримов.

**ШӨҒӨЛЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **шөғөлләнеү.**

**ШӨҒӨЛЛӘНЕҮ** *ҡ.* Ниндәйҙер эш, шөғөл менән булышыу; мәшғүл булыу. *Йорт эше менән шөғөлләнеү. Кәсеп менән шөғөлләнеү. Спорт менән шөғөлләнеү.* ■ *[Өмөтбай] ат, һыйыр алып, крәҫтиән эше менән шөғөлләнмәксе ине.* Ғ. Дәүләтшин. *Ул заводтан китә, ҡыҙын тәрбиәләү менән аҙ шөғөлләнә.* Р. Ниғмәти.

**ШӨҒӘЛӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *ҡар.* **шөғлә.** *Алтын ғына һалдым дарьяға, шөғәләһе төшһөн тип донъяға.* (Халыҡ йырынан).

**2.** *диал.* Шәүлә.

**ШӨҘӨР** *и.* Һыу өҫтөн шаҙралаған ваҡ туңҡыш. *[Ел] һыу өҫтөнән эре шөҙөрҙәр йүгертеп, ағып килгән боҙҙарҙы арғы яҡҡа этеп алып китте.* Ғ. Ибраһимов.

**ШӨЙЛӘ** *р.* **1.** Арыу ғына; ярайһы, ап-арыу. *Шөйлә арыуланды. Шөйлә олоғайылды. Көн шөйлә йылытты. Эштәр шөйлә яҡшырҙы.* ■ *Башта Ҡырымға ниңә килгәнемә үкенгәйнем, хәҙер шөйлә күнектем.* С. Ҡулибай.

**2.** *һөйл.* Улай уҡ, бик үк. *Эштәр шөйлә насар ҙан түгел.*

**ШӨЙТӨ** *и. махс.* Оҙатылған һәм тоҡонлап ишелгән бүйлыҡ еп. *Шөйтө күҙе. Шөйтө яһау.* / Үреү, ишеү өсөн әҙерләнгән нәмә шәлкеме.

**ШӨЙТӨЛӘҮ** *ҡ.* Оҙатылған бүйлыҡ епте салып алып, тоҡонлап үреү, шөйтө яһау. *Бүйлыҡ епте шөйтөләү.* / Үрергә, ишергә әҙерләнгән шәлкем нәмәне төйнәү. *Йүкәне шөйтөләү.*

**ШӨЙТӨМ** *и.* Һөрөлмәй ҡалған үләнле ер. *Шөйтөм бесәне. Шөйтөм ҡалдырып һөрөү.*

**ШӨЙТӨҮ** *ҡ. диал.* Урлау, сәлдереү.

**ШКМИН** *и. диал.* Дегәнәк.

**ШӨКӨР** [*ғәр.*] *и.* Тормоштан, хәл-әхүәлдән риза булған ҡәнәғәтлек хисе. *Шуға шөкөр: күктән ҡурғаш түгел, ямғыр яуа әле тып та тып.* «Совет Башҡортостаны», 1980, 9 декабрь. *Бишенсе киммәт нәмә шөкөр тигән, ниғмәткә шөкөрһеҙлек көфөр тигән.* Аҡмулла. / Шул хисте белдереп әйткән һүҙ. *[Гәрәй — Фәхригә:] Бына бит насип булғас, йәнә күрештек, шөкөр. Ни хәлдә генә тороп ятыу?* Б. Бикбай. *Күп шөкөрҙәр әйтер инде был һуғыштан ҡалған кеше* (Бәйеттән).

□ **Шөкөр итеү** (*йәки* **ҡылыу**) тормоштан, хәл-әхүәлдән риза, ҡәнәғәт булыу. *Донъя именлегенә шөкөр ҡылыу.* ■ *Күп моңайма, шөкөр ит һаулығыңа, уйлап тимен.* Ш. Бабич.

◆ **Аллаға** (*йәки* **алланың биргәненә**) **шөкөр** *ҡар.* **алла.** *Быйыл аллаға шөкөр әле. Балалар ҙа аҡ эсеп, әҙәм булып алдылар... Бүтән өлкән ҡайғы ла юҡ шикелле.* Ғ. Дәүләтшин. **Шөкөр тигән көн** ҡәнәғәт булырлыҡ хәл, тормош. *[Әсәһе:] Мал-йән һау, тыныс йәшәйһегеҙ, шөкөр тигән көнөгөҙ бар.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Алғаныңа ҡарап шөкөр ит, алырыңа ҡарап фекер ит.* Мәҡәл. *Үргә ҡарап фекер ит, түбәнгә ҡарап шөкөр ит.* Мәҡәл. *Шөкөр тигән көн бар, бер һалмалыҡ он бар.* Әйтем.

**ШӨКӨРАНА** [*фарс.*] *и. иҫк.* Кемдеңдер ҡәнәғәт булыу, риза булыу хисе; рәхмәт хисе.

□ **Шөкөрана ҡылыу** (*йәки* **булыу, итеү**) 1) тормоштан риза, ҡәнәғәт булып ҡыуаныу, шөкөр итеү. *[Аллаяр Гөлйөҙөмгә:] Ошондай алтын кәләше булғанға, тын алған һайын салауат әйтеп, шөкөрана ҡылып йөрөргә кәрәк. Бына мин үҙем .. өф итеп, ус төбөмдә генә йөрөтөр инем .. һиндәй аҫыл зат әләкһә.* Ф. Иҫәнғолов; 2) риза булып рәхмәт белдереү. *Намаҙ бәғдендә аллаһы тәғәләгә шөкөрана ҡыл.* М. Өмөтбаев.

**ШӨКӘРӘ** *и.* Телгеләп киптергән икмәк; кәтермәс. *Шөкәрә киптереү.* ■ *Юлда ашарға тип, арыш шөкәрәһе киптерттек.* Ғ. Әмири.

**ШӨКӘТ** [*ғәр.*] *и. иск. кит.* **1.** Буй-һын, килбәт. *Шөкәте юк.*

**2.** Дан, абруй. *Аһ, ни хәтле шөкәтең ҙур.* Х. Ғәбитов.

**ШӨКӘТҺЕҘ** *с.* **1.** Һыны, рәүеше килешһеҙ, ҡарар күҙгә йәмһеҙ; һөйкөмһөҙ, килбәтһеҙ. *Шөкәтһеҙ кеше.* ■ *Бөтә ботаҡтары һынып төшкән, башын да ел ҡолатҡан. Шөкәтһеҙ булып ҡалған ул тирәк.* Н. Ҡәрип. *Донъя ал да гөл, ә юлдар таҡыр, хатта шөкәтһеҙ сусҡалар күренә матур.* Н. Нәжми.

**2.** Урынһыҙ булған, килешһеҙ; йәмһеҙ. *Шөкәтһеҙ һүҙ.* ■ *Разияның Исмәғил менән танышыуы шөкәтһеҙ сәкәләшеү генә түгел.* Я. Вәлиев.

**3.** *р. мәғ.* Саманан тыш, бик. *Шөкәтһеҙ ҙур.* ■ *[Егет] бара торғас, шөкәтһеҙ оҙон аяҡлы бер кешегә тап булған* (Әкиәттән).

**ШӨКӘТҺЕҘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Шөкәтһеҙгә әйләнеү: шөкәтһеҙ булыу. *[Шәмсетдин] бөркөн һалғас, бөтөнләй шөкәтһеҙләнеп китте. Еткән ерән һаҡал, мыйыҡ һис тә килешмәй. Өҫтәүенә, түбәһе таҡыр.* Р. Низамов.

**ШӨМКӘЙТЕҮ** *ҡ.* Баш кейемен батыра кейеү йәки күҙгә төшөрөп ябыныу. *Бүректе шөмкәйтеп кейеү. Яулыҡты шөмкәйтеп ябыныу.*

**ШӨМРӘЙЕҮ** *ҡ.* Күңелһеҙләнеп башты баҫыу. *Шөмрәйеп йөрөү. Шөмрәйеп ултырыу.*

**ШӨМТӘЙЕҮ** *ҡ.* Күңелһеҙләнеп, бошонoп, өндәшмәҫ булыу. *Сәй эскәндә лә [Шаһиҙәле] бер һүҙ өндәшмәй, шөмтәйеп ултырҙы.* Ш. Янбаев.

**ШӨҢГӨР** *и.* Сыңғырлап торған бәләкәй генә ҡыңғырау. *Көмөш шөңгөр. Шөңгөр тауышы.* ■ *Сабып килә ҡолоном, текә һығып тояғын. Томбойоҡтай еҙ шөңгөрө йәмгә ҡумә яп-яғын.* Р. Ғарипов.

♦ **Алтын шөңгөр** *бот. ҡар.* **алтынбаш.**

**ШӨҢКӨҮ** *ҡ. диал.* Сүмәксеү.

**ШӨҢКӘЙ** *и. диал.* Баҫырау. *Шөңкәй менән тарттырыу.*

**ШӨҢКӘЙЕҮ** *ҡ. диал.* Бөгөләү, бөгөлөп төшөү.

**ШӨҢКӘЙТМӘ** *и.* Бер яҡ башын күтәртеп, икенсе яғын ергә ҡаҙап ҡуйылған аҫҡаҡ. *Шөңкәйтмәгә элеү.* ■ *Беҙ, шөңкәйтмә яһап, сәйнүк аҫтыҡ та үҙебеҙ, ҙур эш эшләгән кешеләрҙәй, усаҡ эргәһенә ҡырын төшөп яттыҡ.* Ғ. Ибраһимов.

**ШӨПӨРЛӘҮ** *ҡ. ҡар.* **шопорлау.** *Крандан һыу шөпөрләп аға.*

**ШӨПӨРӨҮ** *ҡ. диал.* Һемереп эсеү. *Улар [Хәликов менән Малышев] һөйләшмәй, тағы сәй шөпөрҙө.* А. Таһиров.

**ШӨПӨР-ШӨПӨР** *оҡш. ҡар.* **шопор-шопор.** *Шөпөр-шөпөр итеү. Шөпөр-шөпөр килеү.*

**ШӨПШӘ** *и. диал.* Һағыҙаҡ. *Ваҡ шөпшә. Шөпшә ояһы.*

**ШӨР:** **шөр ебәреү** *һөйл.* ныҡ ҡурҡыу. *Рәйсетең атаһы куш көбәгән аҫып, урмандан сығып килә. Беҙ шөр ебәрҙек.* Н. Мусин.

**ШӨРҘӨК** *и. һөйл.* Кемдеңдер эш-ҡылығын, һөйләгән һүҙен, кейенеү рәүешен килешһеҙ тип тапҡанда шаяртыу ҡатыш мыҫҡыллап әйтелә. *Кит, шөрҙөк, нимә һөйләйһең?*

**ШӨРЛӨК** *и. һөйл.* Шөрҙөк.

**ШӨРЛӘТЕҮ** *ҡ.* Ҡурҡыуға һалыу; ҡурҡытыу. — *Ҡара, ысынлап та шөрләткәнбеҙ икән Рәйсте, ағаһына ошаҡламаны бит.* Н. Мусин.

**ШӨРЛӘҮ** *ҡ.* Ҡурҡыуға ҡалыу; ҡурҡыу. *Шөрләп бөтөү. Шөрләп китеү. Шөрләп тороу.* ■ *Илгиҙәр: «Бирмәһәң, тартып аламl» — тигән, ти. Бай шөрләп ҡалған, ти* (Әкиәттән).

**ШӨРӨП** [*рус.* шуруп ⟨ *нем.*] *и.* Ос яғына гайка борон ҡуймалы тимер ҡаҙыҡ; бормалы ҡаҙау; винт. *Шөрөп менән нығытыу.*

♦ **Шөрөп бушау** *һөйл.* ғәйрәт ҡайтыу, йүнһеҙләнеү (кешегә ҡарата).

**ШӨРӨПЛӘҮ** *ҡ.* Шөрөп менән нығытыу. *Шкаф шөрөпләү.*

**ШӨРӨП-ШӨРӘМӘН** *и. йыйн. һөйл.* Һәр төрлө шөрөп, винт, ҡаҙаҡтар. *[Механик:] шөрөп-шөрәмән бөтә механизмда ла бер инде ул.* «Һәнәк», 1965, № 7.

**ШӨРӨШ** *с. диал.* Сырыш. *Шөрөш бит. Шөрөшкә әйләнеү.*

**ШӨРӨШӨҮ** *ҡ. диал.* Сырышыу. *Шөрөшөп кибеү.*

**ШӨҺРӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ил алдындағы ҡаҙаныштан килгән дан, абруй. *Шөһрәт ҡаҙаныу.* ■ *Изге юлға тағы барам мин, азатлыҡ һәм шөһрәт табам мин.* Салауат Юлаев. *Мин теләйем бөтәһенә ҙур дан .., мәңге шиңмәҫ шөһрәт Өфөгә.* Ә. Вәли.

**2.** Билдәле бер эшкә бәйле мәшһүрлек. *Шөһрәт тотоу.* ■ *Сабата яһарға оҫталығы менән шөһрәт алған Насир бабайҙан өр-яңы башмаҡ сабата яһатып бирҙеләр.* М. Ғафури.

**ШӨҺРӘТЛЕ** *с.* Ил араһында таныҡлы; данлы, абруйлы. *Шөһрәтле кеше.* ■ *Һуғыш юлы оҙон һәм шөһрәтле булды.* Ҡ. Даян.

**ШӨШЛӨ** *и.* Сабата үргәндә йүкә үткәреү йәки ҡаты нәмәләрҙе аралау өсөн ҡулланылған ағас һаплы тимер ҡорал. *Шөшлө менән йүкә ҡатлау.* ■ *Һәй көнө ағас сәскәләнгәс, шөшлөләр менән тал ҡайырыһы һуйып алалар.* Ғ. Хәйри.

**ШӨШМИН** *и.* Туҙ менән сайырҙы ҡатнаштырып ҡыуған дегет.

**ШӨШТӘЙЕҮ** *ҡ. диал.* Тураға ҡатыу, һерәйеү. *Шөштәйеп ултырыу.*

**ШПАГА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Алышта йәки ярышта ҡулланылған күп ҡырлы нәҙек оҙон үткер ҡорал. *Өс ҡырлы шпага. Күп ҡырлы шпага. Шпага менән алышыу.*

**ШПАГАТ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Нәҙек бау, бәй. *Сус шпагат. Шпагат менән бәйләү.*

**2.** *спорт* Ике аяҡты яп-яҡҡа төп-төҙ итеп һуҙып, ергә лыпын ултырыуҙан ғибәрәт булған гимнастик фигура. *Шпагат яһау.*

**ШПАКЛЁВКА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Екте һылар, тигеҙләр өсөн әлиф, елем һ. б. нәмә ҡушып, аҡбурҙан яһаған ҡамыр һымаҡ матдә. *Шпаклёвка яһау. Шпаклёвка менән һылау.*

**ШПАКЛЁВКАЛАУ** *ҡ.* Шпаклёвка менән һылау. *Иҙәнде шпаклёвкалау.*

**ШПАЛ** [*рус.* шпала ⟨ *гол.*] *и.* **1.** Тимер юлдың рельсы аҫтына һала торған ағас йәки тимер-бетон брус. *Шпал һалыу.* ■ *Егеттәр .. артыҡ тауыш сығармайынса, рельсты ҡайтарып ташла-*

*нылар, шпалдарҙы берәм-берәм ситкә ырғыттылар.* Ә. Ихсан.

**2.** *һөйл.* 1943 йылға тиклем Совет Армияһында юғары команда составын айырыу өсөн форманың яҡаһына ҡуйылған билдә.

**ШПАЛЕР** [*рус.* шпалеры ‹ *нем.*] *и.* **1.** Стенаға элеү йәки уны көпләү өсөн биҙәк һәм һүрәт төшөрөп ҡулдан һуғылған туҡыма. *Шпалерлы стена.*

**2.** Үрмәле гөл өсөн ҡуйылған рәшәткә.

**3.** Юлдың ике яҡ ситенә теҙеп ултыртылған ағастар һәм ҡыуаҡтар теҙмәһе.

**4.** Кем йәки нимәгәлер хөрмәт күрһәтеү өсөн юлдың ике яҡ ситенә теҙелгән ғәскәр.

**ШПАНА́** [*рус.*] *и.* *һөйл.* Һәр төрлө алдаҡсы, уғры кешеләр; жуликтар. *Шпана булып китеү.* ■ *[Һалдаттар] араһында буталып, һәр көн фамилияһын алыштырып, кейем алып, уны һатып.., йышылып, шымарып бөткән дезертирҙар, шпаналар күп, беҙ ҙә шулар араһына инеп киттек.* Д. Юлтый.

**ШПАРГА́ЛКА** [*рус.* ‹ *пол.*] *и.* *һөйл.* Имтихан ваҡытында уҡыусы, студент тарафынан йәшерен ҡулланылған яҙыу. *Шпаргалка яҙыу. Шпаргалка ҡарау.*

**ШПАТ** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* Һуҡҡанда тигеҙ ҡырлы киҫәктәргә ярсыла торған минералдың элекке атамаһы. *Тау шпаты.* **Ялан шпаты** силикаттар төркөмөнә ҡараған минерал.

**ШПА́ТЕЛЬ** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* **1.** Һүрәт төшөргәндә буяуҙы тигеҙ итеп һалыу, шымартыу өсөн ҡулланылған йоҡа ғына ҡорос ҡалаҡ.

**2.** Төҙөү эшендә һылау йәки шпаклевкалау өсөн ҡулланылған ҡалаҡ. *Шпатель менән һылау.*

**3.** Медицинала ҡулланылған бәләкәй генә яҫы ҡалаҡ рәүешендәге ҡорал (ауыҙ ҡыуышлығын, тамаҡты һ. б. ҡарау өсөн). *Тамаҡты шпатель менән ҡарау.*

**ШПИК**[1] [рус. ‹ *нем.*] *и.* Сусҡаның тоҙланған һәм ыҫлап эшкәртелгән һырт майы. *Шпик киҫәге. Шпик яһау.*

**ШПИК**[2] [*рус.* ‹ *пол.*] *и.* *һөйл.* *ҡар.* **шымсы.**

**ШПИЛЬ** [*рус.* ‹ *гол.*] *с.* **1.** Йорттоң өҫтөнә манара рәүешендә эшләнеп, һөңгө һымаҡ ослайып барып бөткән ҡоролма.

**2.** *диңг.* Караптарҙағы якорь, йөк һ. б. нәмә күтәрә торған вертикаль сығыр.

**ШПИ́ЛЬКА** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* **1.** Прическа яһағанда сәсте тотоу өсөн ҡулланылған сәс ҡыҫтырғыс. *Сәсте шпилька менән ҡыҫтырыу.*

**2.** Аяҡ кейеме мастерскойында ҡулланылған махсус итек сөйө. *Ағас шпилька. Металл шпилька. Шпилька ҡағыу.*

**3.** *тех.* Машиналарҙың ике детален беркетә торған винтлы кендек.

**ШПИНА́Т** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* Алабуталар ғаиләһенә ҡараған, япрағы ашауға яраҡлы баҡса үҫемлеге. *Шпинат салаты. Шпинат үҫтереү.*

**ШПИ́НДЕЛЬ** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* *тех.* **1.** Металл ҡырҡҡыс станоктың әйләнмәле төп валы.

**2.** Еп иләү машинаһындағы әйләнеп торған күсәр; орсоҡ.

**ШПИО́Н** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* Шпионаж менән шөғөлләнгән кеше. *Илгә шпиондар ебәреү.* / *һөйл.* Шымсы.

**ШПИОНА́Ж** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* Дәүләт сере итеп һаҡланған төрлө мәғлүмәттәрҙе йыйыуҙан йәки урлауҙан торған, икенсе дәүләт файҙаһына йәшерен рәүештә алып барылған енәйәтле эш. *Шпионаж менән шөғөлләнеү.*

**ШПИОНЛЫҠ** *и.* Шпион булыу эше. *Шпионлыҡҡа әҙерләү.* / Кемделер аҫтыртын күҙәтеүгә бәйле эшмәкәрлек; шымсылыҡ.

□ **Шпионлыҡ итеү** шпион хеҙмәтен үтәү.

**ШПИЦРУ́ТЕН** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* Революцияға тиклем Россияла язаға тартылған һалдаттарҙы кешеләрҙе һуҡтырыу өсөн ҡулланылған һыйғыр сыбыҡ. *Шпицрутен менән һуҡтырыу.*

**ШПОН** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* **1.** *тех.* Бер ҡатлы фанера. *Шпон эшләү. Шпон менән көпләү.*

**2.** *типогр.* Йыйылған хәреф юлдары араһына ҡуйыла торған йоҡа металл пластинка. *Шпон ҡуйыу.*

**ШПО́НКА** [*рус.*] *и.* *тех.* Машиналағы, төрлө механизмдағы деталде тоташтыра торған шына.

**ШПОР** [*рус.* шпора ‹ *нем.*] *и.* *ҡар.* **тибенге** 1, 2. *Көмөш шпор. Еҙ шпор. Шпорлы итек.*

**ШПРИЦ** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* Тәнгә шыйыҡ дарыу ебәреү йәки шыйыҡса һурҙырыу өсөн ҡулланылған поршенлы һәм эсе ҡыуыш энәле цилиндр рәүешендәге медицина ҡоралы. *Шприц менән һурҙыртыу.*

**ШПРОТ** [*рус.* шпроты ‹ *нем.*] *и.* **1.** Сельдтар ғаиләһенә ҡараған ваҡ диңгеҙ балығы. *Шпрот тотоу.*

**2.** Ваҡ диңгеҙ балыҡтарынан яһалған консерва. *Бер банка шпрот.*

**ШПУНТ** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* *ҡар.* **ырмау**[2].

**ШПУР** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* **1.** *тау* Ташты шартлатыу өсөн быраулаған тишек. *Шпур быраулау. Шпур скважинаһы.* ■ *Проходчиктарҙың беренсе звеноһы шпурҙар быраулай.* Р. Сафин.

**2.** *тех.* Шахта мейесендә иретелгән матдәне ағыҙа торған тишек.

**ШРАПНЕ́ЛЬ** [*рус.* ‹ *ингл.*] *и.* Эсенә йомро пулялар тултырылған артиллерия снаряды. *Шрапнель ярсығы.* ■ *Беҙҙең баш осонда бер шрапнель ярылды.* Д. Юлтый.

**ШРИФТ** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* **1.** Айырым бер текст өсөн һайланған билдәле бер төрҙәге типографик хәрефтәр комплекты. *Ҡалын шрифт. Нәҙек шрифт.*

**2.** Хәрефтең яҙыуҙағы график күренеше. *Ғәрәп шрифты.*

**ШТАБ** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* **1.** Һәр төр ғәскәри бүлектәргә етәкселек итеү органы һәм шунда ингән кешеләр төркөмө. *Генераль штаб. Дивизия штабы. Штаб начальнигы.*

**2.** Бер-бер нәмәнең етәкселек органы. *Дружинасылар штабы.*

**ШТА́БЕЛЬ** [*рус.* ‹ *нем.*] *и.* Ниҙеңдер тигеҙләп һалған өйөмө. *Штабелгә һалыу.* ■ *Торбаларҙы ситкә сығарып штабелгә өйҙөләр.* Ғ. Ибраһимов.

**ШТАБИ́СТ** [*рус.*] *и.* *һөйл.* Штаб офицеры. // *Штабист майор.* ■ *Пленныйҙы оҙаттылар. Ул үҙ командованиеһының көсөн, хәлен һәм хәрәкәтен һөйләп бирерлек белемле штабист булырға тейеш.* Ә. Ихсан.

**ШТАБС-КАПИТА́Н** [*рус.*] *и.* Революцияға тиклем рус армияһында поручиктан юғары капи-

тандан түбән булған офицер чины һәм шул чиндағы кеше.

**ШТАКЕ́ТНИК** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Ҡойма, рәшәткә яһай торған йоҡа тар таҡта; рәшәткә таҡтаһы. *Штакетник ҡағыу.*

**2.** Шундай таҡтанан яһалған кәртә, ҡойма. *Баҡсаны штакетник менән уратыу.*

**ШТАМП** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* **1.** Ойошманың исеме яҙылған мөһөр һәм шуның ҡағыҙға төшкән һүрәте. *Штамп баҫыу.* ■ *Бланкыларга Ҡарамалы ауыл советының штампы менән печаты һуғылған ине.* Б. Бикбай.

**2.** Бер үк төрлө нәмәне күпләп эшләү өсөн ҡулланылған өлгө; ҡалып. *Штампҡа һалыу.*

**3.** *күсм.* Берәй эштә үрнәк итеп алынған, уға туранан-тура һуҡырҙарса эйәргән нәмә; ҡалып. *Әҙәби штамп.*

**ШТАМПЛАТЫУ** *к.* Штамп һуҡтырыу, штамплы итеү. *Хатты штамплатыу. Бандеролде штамплатыу.*

**ШТАМПЛАУ** *к.* **1.** Штамплы итеү, штамп һуғыу. *Документты штамплау.*

**2.** Штампҡа һуғыу. *Штамплау цехы.*

**ШТАМПЛАУСЫ** *и.* Штампҡа һуғыусы эшсе. *Штамплаусы булып эшләү.*

**ШТА́НГА** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Ҡайһы бер механизмдарҙа металл кендек рәүешендәге деталь. *Быраулау штангаһы.* ■ *[Скважиналарҙың] береһендә улар штанганың өҫкә күтәрелгәндә ауырыраҡ тауыш менән ҡалтырауын ишетте.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Футбол ҡапҡаһындағы өҫкө арҡыры ағас. *Туп штангага тейгән.*

**3.** Ауыр атлетика менән шөғөлләнеү өсөн ике яҡ башына алынмалы дискылар ҡуйып күтәрә торған металл кендек. *Штанга күтәреү буйынса ярыш. Штанга менән шөғөлләнеү.*

**ШТАНГЕНЦИ́РКУЛЬ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Нәмәнең ҡалынлығын йәки түңәрәк тишектең киңлеген үлсәү ҡоралы. *Штангенциркуль менән үлсәү.*

**ШТАНГИ́СТ** [*рус.*] *и.* Штанга менән шөғөлләнгән спортсы. *Штангистар ярышы.*

**ШТА́ПЕЛЬ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. махс.* **1.** Оҙонлоғо менән йөн, мамыҡ сүстәргә яҡын торған яһалма йәки синтетик сүс. *Штапель сүсе.*

**2.** *һөйл.* Ошо сүстән һуғылған туҡыма. *Биҙәкле штапель. // Штапель күлдәк.*

**ШТАТ**[1] [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ҡайһы бер буржуаз илдәрҙәге федерация составына ингән территориаль берәмек. *Америка Ҡушма Штаттары. Мадрас штаты.*

**ШТАТ**[2] [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ойошмалағы хеҙмәткәрҙәрҙең даими составы. *Штатты ҡыҫҡартыу. Штаттан тыш эшләү.*

**ШТАТИ́В** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Лабораторияла приборҙар тотторοу өсөн эшләнгән ҡулайлама; ҡыҫа. *Штативҡа ҡуйыу.*

**2.** Фото, кино аппараты һәм астрономик, геодезик приборҙар ҡуйыу өсөн ҡулланылған йыйылмалы өсаяҡ. *Штативҡа ҡуйыу.*

**ШТА́ТСКИЙ** [*рус.*] *с. һөйл.* Хәрби эшкә, дингә мөнәсәбәте булмаған; гражданский. *Ҡаһарман кантон ҡытатский ник булдың штатский* (Халыҡ йырынан).

**ШТЕ́ЙГЕР** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. һөйл.* Тау мастеры. *Штейгер вазифаһы. Штейгер булып эшләү.* ■ *Штейгер менән эшселәр араһында һәр ваҡыт шундай талаштар булып тора. Ләкин шахтала эшләүҙе һаман туҡтатмайҙар.* М. Ғафури.

**ШТЕ́МПЕЛЬ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Киреһенсә төшөрөлгән яҙыу йәки һүрәттән оттиск алыу өсөн эшләнгән прибор. *Штемпель баҫыу.*

**2.** Ошо прибор ярҙамында алынған оттиск.

**ШТЕ́ПСЕЛЬ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Ҡорал-ҡорамалды электр селтәренә тоташтыра торған ҡулайлама. *Штепсель ҡуйыу.*

**2.** *һөйл. ҡар.* **розетка** 2.

**ШТИБЛЕ́Т** [*рус.* штиблеты ⟨ *нем.*] *и. иҫк.* Баулы ирҙәр туфлийы. *Күн штиблет.* ■ *[Иштугандың] аяғында .. шығырлауыҡлы ялтыр ҡара штиблет.* З. Биишева.

**ШТО́ЛЬНЯ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. тау.* Ер аҫтындағы эш урынан өҫкө яҡ менән тоташтыра торған горизонталь йәки ауыш итеп эшләнгән юл. *Вентиляция штольняһы.*

**ШТО́ПОР** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* **1.** Шешә тығынын тартып аса торған бырау рәүешендәге кендек. *Штопор менән асыу. Тығынды штопор менән сығарыу.*

**2.** *авиа.* Самолёттың баш түбән әйләнеп төшкән хәрәкәте.

**ШТОР** [*рус.* штора ⟨ *франц.*] *и.* Шнур ярҙамында ситкә тартыла йәки өҫкә күтәрелә торған тәҙрә шаршауы. *Биҙәкле штор.* ■ *Ҙур тәҙрәләргә ебәк штор эленгән. Асыҡ тәҙрәнән пианино тауышы ишетелә.* Д. Юлтый.

**ШТОРМ** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Диңгеҙ, океандағы көслө дауыл. *Штормға эләгеү.*

**ШТОФ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Үҙенән биҙәк сығарып һуҡҡан ҡалын ебәк йәки йөн туҡыма. *Диван штофы. Штоф шаршау.* ■ *Ситса ла күлдәк ай буйыңда, штоф камзулыңды кейһәнә* (Халыҡ йырынан).

**ШТРАФ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Яза рәүешендә түләтелгән һалым. *Штраф һалыу.* ■ *Болала ҡатнашҡан һәр кеше ҡаҙнаға штраф рәүешендә бер ат түләргә тейеш ине.* И. Аҡманов. / Ниҙелер үтәмәгән, ҡағиҙә боҙған өсөн бирелгән яза. *Штрафлы уйын. Штраф биреү.* **Штраф майҙаны** *спорт* футбол, хоккей һымаҡ спорт уйындарында штраф тубы тибеү өсөн ҡапҡа янындағы майҙан. **Штраф тубы** *спорт* футбол уйынында ҡағиҙә боҙған өсөн ҡапҡаға табан тибергә рөхсәт ителгән туп.

◆ **Штраф батальоны** ғәйепле табылған хәрби кешеләр өсөн махсус дисциплинар батальон.

**ШТРЕ́ЙКБРЕ́ХЕР** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Забастовка ваҡытында эшселәр мәнфәғәтенә хыянат иткән кеше.

**ШТРЕК** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ҡаҙылма байлыҡ ҡатлауы буйынан яһалған ер аҫты юлы. *Штрек ҡаҙыу. Штреккә инеү.* ■ *Ҡолсобай .. елкәһендәге ауыр ағастарҙы оҙон коридорға оҡшаған тар, тәпәшәк штрек буйлап һөйрәп, һуҡыр сыҫкан һымаҡ урмәләне.* Я. Хамматов.

**ШТРИХ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Һүрәттең төп элементын тәшкил иткән һыҙыҡ. *Штрих менән күрһәтеү. Штрих ярҙамында биреү.*

**2.** *күсм.* Кем йәки нимәгәләр хас бер һыҙат,

күренеш. *Үҙенсәлекле штрих.* ■ *[Образ] айырым штрихтар менән генә бирелгән булһа ла .. ҡатын-ҡыҙҙарҙың социализм төҙөүҙә актив көс булып үҫеүен күрһәтә.* С. Сафуанов.

**ШТУКАТУ́Р** [*рус.*] *и.* Штукатурлау менән шөғөлләнгән эшсе. *Штукатурҙар бригадаһы.*

**ШТУКАТУ́РКА** [*рус.* ⟨ *ит.*] *и.* Йәбешеүсән матдәләрҙе, цемент, ҡом, эзбиз кеүек нәмәләрҙе һыуға иҙеп әҙерләгән төҙөлөш материалы; иҙмә. *Штукатурка әҙерләү.* / Шул иҙмәнең стенаға һылағандан һуң ҡатҡан ҡатламы. *Штукатурка ҡойолоу.*

♦ **Ҡоро штукатурка** картон менән йәбештереп гипстан эшләнгән, йоҡа табаҡ рәүешендәге төҙөү материалы (штукатурка урынына ҡулланыла).

**ШТУКАТУРЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **штукатурлау.** *Штукатурланған стена.*

**ШТУКАТУРЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **штукатурлау.** *Йортто штукатурлатыу.*

**ШТУКАТУРЛАУ** *ҡ.* Түшәм, стеналарҙы штукатурка менән һылап шымартыу. *Стенаны штукатурлау. Тыштан штукатурлау. Эстән штукатурлау.*

**ШТУКАТУРСЫ** *и.* Штукатурка яһаусы эшсе; штукатур.

**ШТУРВА́Л** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Карап, самолёт, комбайн һәм башҡа шуның һымаҡ машиналарҙың руль ҡуласаһы. *Карап штурвалы. Комбайн штурвалы. Трактор штурвалы.* ■ *Кораблдә йөҙәм, ҡулым штурвалда бөгөн дә. Тик ҡаршымда диңгеҙ валы түгел, сайҡалалар алтын игендәр.* Ғ. Байбурин.

**ШТУРВАЛСЫ** *и. һөйл.* Штурвалда торған, штурвал менән эш иткән кеше. *Комбайн штурвалсыһы.*

**ШТУРМ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Дошман ныҡытмаһын яулап алыуға йүнәлтелгән ҡаты һөжүм. *Штурмға әҙерләнеү. Штурмға күтәрелеү.* ■ *[Шаймөратов:] Беҙ штурмға барабыҙ. Бурыс: дошмандың .. ут дүңгәләген өҙөп, үҙебеҙҙекеләргә ҡушылыуҙан тора.* Ә. Ихсан.

**2.** Ниндәйҙер маҡсатҡа ирешеү ниәтендә башҡарылған ҡыҙыу, ҡәтғи эш. *Күп төрлө ҡатмарлы аппаратура, ҡеүәтле быраулау техникаһы, көслө транспорт менән ҡоралланған геологтар Урал тәрәнлектәренә штурм башланылар.* Д. Бураҡаев.

**ШТУ́РМАН** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Һыу аҫты йәки һыу өҫтө караптарын самолеттарҙы йөрөтөүсе белгес. *Карап штурманы. Самолёт штурманы. Штурман булып эшләү.* ■ *.. Ғәли Мәжитов бомбаға тотоу авиацияһының штурманы булып хеҙмәт итә башланы.* Ә. Вәли.

**ШТУРМЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **штурмлау.** *Магниткала суйын, ҡорос ҡойоуҙың яңы рекордтары штурмланды.* Д. Исламов.

**ШТУРМЛАУ** *ҡ.* **1.** Штурмға алыу. *25 августа Сталинград осада хәлендә тип иғлан ителде. 13 сентябрҙә иртән дошман ғәскәрҙәре уны штурмлай башланы.* Ә. Ихсан. *1774 йылдың 18 июнендә Салауат Пугачёв ғәскәрҙәренә яңынан ҡушыла һәм Аса крепосын штурмлауҙа актив ҡатнаша.* «Салауат Юлаев», 1952.

**2.** *күсм.* Нимәнелер өйрәнеү, тикшереү маҡсатында ныҡышмалы эшләү. *Космосты штурмлау.*

**ШТУРМОВИ́К** [*рус.*] *и.* Ерҙәге объекттарға һөжүм яһай торған хәрби самолёт. *Бына штурмовиктар икешәрләп-икешәрләп дошман танкылары өҫтөнә пикировка башланылар.* «Ағиҙел», 1964, № 2.

**ШТУРМОВЩИ́НА** [*рус.*] *и. һөйл.* Ваҡытында үтәмәгәндән килгән өҙөклөктө бөтөрөү өсөн бөтә көстө туплап ашығыс башҡарылған ҡыҙыу эш. *Штурмовщинаға юл ҡуйыу.*

**ШТУФ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и. геол.* Тикшеренеү йәки коллекция өсөн алынған руда киҫәге, минерал өлгөһө. *Штуф алыу.*

**ШТУ́ЦЕР** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* **1.** Эре калибрлы һунар мылтығы.

**2.** *тех.* Торбаларҙың башын тоташтырыу өсөн тыш яҡтан винт һыры һалынған ҡыҫҡа ғына торба. *Әминә штуцерҙы ҡараны. Уның диаметры билдәләнгән режимға тура килә ине.* Н. Асанбаев.

**ШТЫК** [*рус.* ⟨ *польск.*] *и.* **1.** Сәнсеү өсөн мылтыҡ көбәгенең осона кейҙерелгән үткер беҙле һуғыш ҡоралы. *Штык һуғышы. Штыкка алыу.* ■ *Үҙ-ара буталғанда бер-береһенең штыктарына ҡаҙалып яраланған ике йәйәүле һалдатты бәйләп маташалар ине.* А. Таһиров. *Ҡулыбыҙҙа патрон бөткәс, штыҡ менән ташландыҡ* (Бәйеттән).

**2.** Йәйәүле ғәскәрҙе иҫәпләү берәмеге; йәйәүле һалдат. *Егерме биш штык ҡамауҙан сыҡҡан.*

**ШУБЫР** *и. диал.* Ялан киндер.

**ШУҒА** *күрһ. а.* **1.** Һөйләмдә тултырыусы вазифаһын үтәп, башта әйтелгән нәмә һәм төшөнсәне алыштырып килә. — *Артта лейка барҙыр, шуға һыу тултырып ал да иҙәнгә һип!* С. Агиш.

**2.** Эш-хәлдең сәбәбен күрһәтеп, билдәләп килә; шул сәбәпле, шуның өсөн. *[Һөнәрсе] һәр ваҡыт эшләнгән, өйрәнгән. Шуға ахыры, ул үҙ һөнәрендә көндән-көн үҫкән, камиллашҡан.* З. Биишева.

♦ **Шуға күрә** эйәртеүле ҡушма һөйләмдең баш һөйләмен һөҙөмтә эйәрсен һөйләм менән теркәү өсөн ҡулланыла; шуның өсөн, шунлыҡтан. *Төшөндөм мин тәрән мәғәнәһен ҡабатланмаҫ, яҡты ғүмерҙең. Шуға күрә ҡайғы ауырҙырҙа, шуға күрә һағыныу көслөлөр.* Х. Ҡунаҡбай. **Шуға ҡарамаҫтан** мәғәнә яғынан бер-береһенә ҡаршы ҡуйылған ике һөйләмде теркәү өсөн ҡулланыла; шулай булһа ла. *Сәмәләп яғалар икән, театрҙа һалҡын. Шуға ҡарамаҫтан, халыҡ күп килгән.* Б. Бикбай.

**ШУҒАСА** *р.* Шуға тиклем, шул ваҡытҡа тиклем. *«Аждаһа йыланы килергә бары әс кенә көн ваҡыт ҡалған. Шуғаса барып етергә тырыш»,— тигән ҡарсыҡ [Ҡамыр батырға]* (Әкиәттән).

**ШУЙ** *и. диал. ҡар.* **еҫ** 1.

**ШУЙТЫҠ** *с. диал.* Һылтыҡ. *Шуйтыҡ кеше.*

**ШУЙТЫҠЛАУ** *ҡ. диал.* Һылтыҡлау. *Шуйтыҡлап атлау.*

**ШУҠ** *с.* **1.** Тик тормаған, бөтә нәмәгә тейеп барған, хәрәкәтсән, шаян (күберәк балаларға ҡарата). *Шуҡ бала. Шуҡ булыу.* ■ *Орсоҡ шикелле өйрөлгән шуҡ маһайға ҡарайым да, алыҫҡа ҡалған көндәрҙе уйлайым.* В. Нафиков.

2. Ҡыҙыҡ өсөн төрлө мәрәкә, мутлыҡ эшләргә яратҡан. *Ғариф ни — шуҡ кеше: малайҙарҙы .. тау һарҡыуҙарында ғына арбаға ултыртып, юл буйы гип әйтерлек мәрәкәләп, йәйәү алып барҙы.* Б. Бикбай.

♦ **Шуҡ ҡуллы** *йәки* **ҡулы шуҡ** кеше нәмәһенә тейеп барыусан; ҡулы оҙон; уғры.

**ШУҠЛАНЫУ** *ҡ.* Шуҡҡа, шаянға әйләнеү, шуҡ булыу. *Толомдарыңды тағатып, былбылдарҙы һағайтып, йөрөйһө килә шуҡланып, бергә таңдар һарғайтып.* Х. Назаров.

**ШУҠЛЫҠ** *и.* Шуҡ кешегә хас сифат. *Бала шуҡлығы.* ■ *[Вәзих, Фәтихтың] шуҡлыҡтары менән бөтә төбәккә яманаттары сыҡһа ла беҙгә бер төрлө лә зарарҙары теймәй торғайны уларҙың.* Р. Ғабдрахманов.

**ШУҠМАЙЫУ** *ҡ. диал.* Уҡмашыу.

**ШУҠМАРЫЛЫУ** *ҡ. диал.* Уҡмашыу.

**ШУЛ (шуның, шуға, шуны, шунан, шунда)** *күрһ. а.* **1.** Алда фекер йөрөтөлгән, билдәле булған кеше йәки нәмәгә, хәл-ваҡиғаға күрһәтеп, уны атағанда әйтелә. *Шул ауыл. Шул хәлдән һуң.* ■ *Был инде һәр ваҡыт яҡты, был илдә һәр саҡ ал таң. Шул бына беҙҙең тыуған ил, шул бына беҙҙең ватан!* Р. Ниғмәти. *Кеше өсөн йәшәй, кеше өсөн үлә белгән һәйбәт кешеләр бар. Шуныһы ҡыуаныслы.* З. Биишева. / Баш һөйләмдә килеп, эйәрсен һөйләм төшөнсәһенең атамаһы рәүешендә уны баш һөйләмгә бәйләй. *Бел шуны: йәшлек үтер.* Ш. Бабич. *Яман әҙәм шул булыр, ауыҙында ике тел булыр* (Ҡобайырҙан).

2. Ваҡыт төшөнсәһендәге һүҙҙәр менән билдәле бер мәлгә күрһәтә. *Шул мәлдә. Шул саҡ.* ■ *Һаҙлыҡ, аяҡтар батып бара. Шул ваҡыт бер таҡта күрҙем.* Д. Юлтый.

3. Айырым һүҙҙәргә ҡушылып, ҡушма рәүеш яһай. *Шул көйө.* ■ *Мин шул рәүешле башта ҡамыр баҫыусы, һуңынан пекарь булып .. эшләп йөрөнөм.* Т. Йәнәби.

4. *киҫ. мәғ.* Хәбәр төшөнсәһендәге һүҙгә эйәреп, уны көсәйтеп, раҫлап килә. *Эйе шул. Юҡ шул. Шулай шул. Килмәне шул.* ■ *Осор инем, шашынып осор инем, онотолған шул бала шатлығым.* Х. Ҡунаҡбай.

5. *киҫ. мәғ.* Үҙенән һуң торған һүҙҙәрҙең мәғәнәһен көсәйтеп килә. *Шул ҡәҙәре. Шул арала.* ■ *Я, хоҙа!.. Донъяла шул хәтле лә тыйнаҡ, шул хәтле лә изге йәнле кешеләр була икән дә баһа!* З. Биишева.

♦ **Шул иҫәптән** *ҡар.* **иҫәп. Шул уҡ** баштан билдәле, бер үк. *Шул уҡ эш. Шул уҡ ағас. Шул уҡ юл.* **Шул уҡ ваҡытта** ҡаршылыҡлы хәлдәр бер ыңғай булғанда әйтелә. *Ул Ҡайынлы ауылындағы яңылыҡтар өсөн бик ныҡ шатлана, шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер етешһеҙлектәр өсөн ысын йөрәктән әрней.* Б. Бикбай. **Шул шул** фекерҙе дөрөҫләү, нығытыу өсөн әйтелә. *Тансаларҙа кемде генә һоҡландырмай инегеҙ? Шул шул, ул ваҡытта икегеҙ ҙә һау-сәләмәт, сибәр инегеҙ!* Ғ. Байбурин. **Шул әҙере** бик тиҙ, шунда уҡ. *Батырҙар уны [Буҙансыны] шул әҙере өҫкә тартып сығарғандар* (Әкиәттән). Әллә шул нимәгәләр икеләнеп ҡарағанды белдерә. *[Байгужа:] «Бәлки һин берәр ай лазаретта ятырһың әле»,— тине.. «Әллә шул»,— тинем.* Д. Юлтый.

**ШУЛАЙ** *күрһ. а.* **1.** Эштең нисек барыуын күрһәтә торған рәүештәргә алмаштырып килә; шул рәүешле. *Шулай итеү. Шулай йәшәү. Шулай эшләү.* ■ *Айыу тиһәң — айыуҙы, .. арыҫлан тиһәң — арыҫланды тере көйө тотоп алып ҡайтыуҙы бабай уйынға ла күрмәгән, ти,— ул шулай көслө булған* (Әкиәттән). *Тирҙәр ағыла, ҡандар һауыла, малдар шулай табыла* (Халыҡ йырынан). / Эштең башҡарыу рәүешен күрһәткәндә әйтелә. *Ана шулай эшлә. Бына шулай яҙ.* / Эйәрсен һөйләмде баш һөйләмгә бәйләй. *[Ярлы] нисек тура килде — шулай көн күргән.* З. Биишева.

2. Билдәле бер мәлгә, эш-хәлгә бәйләп хикәйәләгәндә ҡулланыла. *Шулай бер мәл. Шулай бер ваҡыт.* ■ *Шулай бер көн Өфөлә йәшәгән кесе улымдан хат килеп төштө.* Р. Низамов.

3. *мөн. мәғ.* Хуп күргәндә, дөрөҫ тип тапҡанда ҡулланыла. *Шулай шул.* ■ *Быға тиклем өндәшмәй торған Ҡаҙанҡап мулланы йөпләне: «Шулай, .. мулла».* Һ. Дәүләтшина. **Шулай бит** әйтелгән фекерҙе хуплатыу рәүешендә әйтелә. *[Фәйзуллин:] Государство менән дә идара иткән кеше түгел инек, итәбеҙ бит, иткәндә лә нисек итәбеҙ, шулай бит, Мәхмүтов.* С. Агиш. **Шулай булмай ни** һөйләүсенең уй-фекерен йөпләгәндә ҡулланыла. *Редакторҙың был фекерен Ғамир ихлас хупланы: «Дөрөҫ, ә теге ни, шулай булмай ни!»* Б. Бикбай. / Һөйләгән һүҙҙәргә һығымта рәүешендә әйтелә. *Шулай, ул көндө танышыу шуның менән бөттө.* Т. Йәнәби. *Шулай, бында әлегә ҡала ҡала, мин китәмен илгә — далаға.* Ғ. Амантай. **Шулай инде** әйтелгән фекергә йомғаҡ, һығымта яһау рәүешендә ҡулланыла. *Ҡайҙа барма — үткән иҫкә төшә, ә үткәндәр алыҫ ҡалалар. Шулай инде — ғүмер уҙған һайын, хәтерләүҙәр арта баралар.* Н. Нәжми. **Шулай итеп** уй-фекергә йомғаҡ яһағанда инеш һүҙ мәғәнәһендә ҡулланыла. *Шулай итеп, һабантуйҙарында шөһрәт алған ике уҙаман.* Ҡ. Даян. *Шулай итеп, Йылкыбай уйламаған ерҙән батшаның кейәүе булып китә* (Әкиәттән). **Шулай кәрәк** 1) тейеш булғанды талап иткәндә ҡулланыла. *[Айбулат:] Роман Борисович, нишләп беҙҙе былай бик хөрмәтләп ҡаршы алдығыҙ әле? — тине.— Шулай кәрәк, иптәш Айбулат. Быны революция талап итә.* Һ. Дәүләтшина; 2) кешенең күңелһеҙ хәлгә осрауына үсәгән рәүештә әйтелә. **Шулай булғас** әйтелгән уй-фекергә йомғаҡ, һығымта яһағанда ҡулланыла; тимәк. *Ирек ҡоло башҡорт, шулай булғас, Дутов, Колчак яҡлы булырмы.* Ш. Бабич. **Шулай булһа ла** *йәки* **шулай булыуға ҡарамаҫтан** нисек кенә булмаһын, ни булһа ла; барыбер. *Ҡояш байырға күп тә ҡалмаған, шулай булһа ла китә бирҙе, китте лә китте. Ат юҡ та юҡ.* Т. Хәйбуллин. *Ҡырымды маҡтаған сакта: «Был донъя йәннәте!» — тиҙәр. Шулай ҙа юҡтыр унда Агиҙел, Дим, Ашҡаҙар, Инйәр!* М. Ғафури. **Шулай уҡ** 1) ике нәмәне тиңләштереп, оҡшатҡанда әйтелә. *Алдағы частар әкренләп кире сигә. Беҙ шулай уҡ артҡа сигәбеҙ.* Д. Юлтый; 2) аптырау, шикләнеү ҡатыш әйтелгән һорауҙа ҡулланыла. *Шулай уҡ Зөлхизә ризыҡһыҙ ҡалырмы икән ни бөгөн?* З. Биишева. **Шулаймы ни** ғәжәпләнгәндә, аптырау ҡатыш әйтелә.

♦ **Нисек тура килде шулай, нисек** (*йәки* **ҡалай**) **етте шулай** тәртипһеҙ рәүештә. *Башҡортостан тәбиғи көтөүлектәргә бай. Ләкин әлегә саҡлы күп кенә колхоздарҙа һәм совхоздарҙа улар планһыҙ, нисек тура килде шулай файҙаланыла.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 28 апрель.

**ШУЛАЙТЫУ** *к. ҡыҫк. ф. һөйл.* Шулай итеү. *Шулайтып йәшәү. Шулайтып эшләү.* ■ *Ауылдан ҡалаға — икмәктәр, ҡаланан ауылға — күлдәктәр. Шулайтып: ҡала-ауыл берләшеп, көн итә күмәкләп, гөрләшеп!* Ғ. Амантай.

**ШУЛАП** *и. диал.* Ҙур ялғаш, улаҡ. *Керҙе шулапта йыуыу.*

**ШУЛҠ-ШУЛҠ** *окш.* Ҡуйы шыйыҡлыҡ сайпылғанда, һелкенгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шулҡ-шулҡ итеү. Шулҡ-шулҡ килеү.*

**ШУЛҠЫЛДАУ** *к.* Шулҡ-шулҡ итеү, шулҡ-шулҡ килеү. *Йомортҡа иҫкергән, шулҡылдап тора.*

**ШУЛПА** *и. диал.* Һурпа. *Ҡаҙ шулпаһы.*

**ШУНАН** *күрһ. а.* **1.** Нимәгәлер сығанаҡ булған урын-ерҙе атап күрһәткәндә әйтелә; шул тәңгәлдән, шул ерҙән. *Шунан өҫтәге юл. Шунан башла.* ■ *Шунан аҙыраҡ барып һулғараҡ тартһаң, шыңғырлап ятҡан таҡыр ялан юлы ике тау араһына алып кереп китә.* Һ. Дәүләтшина. / Башланған ваҡытты атап күрһәткәндә әйтелә; шул мәлдән шул ваҡыттан. *Шунан һуң. Шунан алда. Шунан бире. Шунан ике йыл үткәс.* / Эйәрсен һөйләмдәге ҡайҙан, ҡайҙа һүҙҙәре менән бәйләнешкә инеп, уны баш һөйләмгә бәйләй.

**2.** Нимәнеңдер сәбәбен күрһәткәндә әйтелә; шунлыҡтан. *Туҡтауһыҙ ямғыр яуа, йылғаның ташыуы шунан.*

**3.** *р. мәғ.* Бер-бер артлы килгән эш-хәлдәрҙе билдәләгәндә әйтелә. *Ҡош ҡаҙҙарҙан да өҫкә күтәрелә, шунан яурынын йыйыра биреп: ҡаҙҙар теҙеменә шыҡыйып атыла.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». *[Аҡназар] тәүҙә кесе улын арьяҡҡа сығарып, шунан олоһо артынан кире сыҡмаҡ була* (Әкиәттән). / Кемдеңдер һүҙҙе дауам итеүен һорағанда әйтелә; йә тағы. *[Сәғиҙә:] Шунан, шунан, тағы ла нимә тигән була?* М. Тажи.

♦ **Шунан ары** шунан һуң; йәнә, тағы. *Минең был фекерҙең сәбәбен һорашығыҙ. Шунан ары Айбулат ни әйтер — шуны тыңлағыҙ.* Һ. Дәүләтшина. **Шунан бер саҡ** (*йәки* **ваҡыт**) билдәле бер мәлдә, бер заман. *Шунан бер саҡ әйберҙәрен күтәреп, бер ҡыҙ килеп сыға. Яулығын асып ебәрһә: ай шикелле һылыу, ти был ҡыҙ* (Әкиәттән). **Шунан килеп** әйтелгән фекерҙе дауам иткәндә ҡулланыла. *Шунан килеп, Юлия хәҙерге көндә беҙҙең партияның тотҡан юлын һин беләһең: революция эше туҡталып торорға тейеш түгел.* Һ. Дәүләтшина. **Шунан һуң** билдәле бер эш-хәлдән һуң; артабан. *Алланан һаҡлап ҡалайыҡ был донъяны, шунан һуң донъя, белһәгеҙ, беҙҙеке!* Ш. Бабич. **Шунан ни** алдағы фекергә баҫым яһап хикәйәләгәндә әйтелә. *Имеш, Ҡайынлы ауылында ҡаланан килгән ниндәйҙер йүнһеҙ .. колхозға инмәүселәрҙең ҡапҡаларын дегеткә буяп сыҡҡан.., шунан ни халыҡ түҙмәгән, уны бысраҡ сыбыҡ менән ҡыуа башлаған.* Б. Бикбай.

● *Тәгәрмәстең алды ҡайҙан тәгәрләһә, арты ла шунан тәгәрләй.* Мәҡәл.

**ШУНДА** *күрһ. а.* **1.** Эшкә бәйле урынды атап күрһәткәндә ҡулланыла; шул урында, шул ерҙә. *Шунда ята. Шунда эшләй. Шунда йәшәй.* ■ *Иртә менән бөтә ауыл халҡы клуб эргәһенә митингыға йыйылды. Беҙ, малайҙар ҙа шунда.* Н. Мусин. *Үҙ илкәйем бигерәк яҡын, ата бабам шунда тыуғанға* (Халыҡ йырынан). / Эш-хәл йүнәлтелгән урынды атап күрһәткәндә ҡулланыла; шул урынға, шул ергә. *Бара торғас, ҡала ситендәрәк бер ерҙә ут күренеп ҡала. Шунда китә был* (Әкиәттән). *Һыу буйында станса бар иртән шунда етергә* (Халыҡ йырынан). / Эйәрсән һөйләмдәге ҡайҙан, ҡайҙа һүҙҙәре менән бәйләнешкә инеп уны баш һөйләмгә бәйләй. *[Сауҙагәр — хеҙмәтсеһенә:] Ана бейәгә атланып ал да, ул ҡайһы яҡҡа алып сапһа — шунда кит!* (Әкиәттән).

**2.** Берәй эш-хәлгә бәйле ваҡытты атап күрһәткәндә ҡулланыла; шул мәл, шул ваҡыт, шул саҡ. *Шунда шатлыҡтан халыҡ шау килде.* Ш. Бабич. *Динамиттар таш аҡтарҙы, һауа ярыла .. сайҡалғандай булды мин баҫҡан тау, тирбәлгәндәй шунда бар Урал.* Ғ. Сәләм.

**3.** Әйтелгән фекерҙе дөйөмләштереп, баҫым яһап, сисеп күрһәткәндә ҡулланыла. *Эштең сере шунда. Бөтә хикмәт шунда.* ■ *Уның [Мәлик Харистың] шиғырҙарының үҙенсәлеге һәм уларҙың тәьҫир көсө шунда: улар кешелекле, улар кеше менән асыҡтан-асыҡ, бер төрлө лә хәйләһеҙ, бөтә йөрәктән һөйләшә.* Н. Нәжми.

**4.** *мөн. мәғ.* Кәмһетеү, риза булмау төҫмөрө өҫтәгәндә ҡулланыла. *Уҡып йөрөй шунда. Әҙәм көлдөрөп йөрөйһөгөҙ шунда.* ■ *Ни ер күрмәй, донъя тәмен һиҙмәй ята шунда төпкөл ауылда.* Ғ. Сәләм.

♦ **Ҡайҙа етте шунда** теләһә нисек, тәртипһеҙ. **Шунда бер** ниндәйҙер бер. *Ай китә был, йыл китә, барып етә бер ҡалаға. Шунда бер ерҙә фатир алып, йәшәй башлай* (Әкиәттән). **Шунда ла** шулай булыуға ҡарамаҫтан; шулай ҙа. *Зөләйханың был хатын алғас, йәш күңел бит, уны тағы барып күргe килде. Шунда ла күңелдең көслөрәк яғы был ҡыҙҙан алыҫлашыу яғында ине.* Т. Йәнәби. **Шунда уҡ** шул ике арала, бик тиҙ. *[Егет] ҡыҙҙың тәҙрәһенә сиртҡән. Ҡыҙ шунда уҡ йүгереп килеп сыҡҡан* (Әкиәттән).

**ШУНДАЙ** *күрһ. а.* **1.** Кемгәлер йәки нимәгәлер сағыштырып күрһәткәндә ҡулланыла; шуның һымаҡ, шуның кеүек. *Шундай кеше. Шундай уҡ ер. Шундай уҡ оҫта.* ■ *Хәҙер сәсеү килеп еткәс, тоҡтар тағы ла кәрәк булды. Колхоздың баш кешеләре шундай нәмәләр хаҡында әҙ генә булһа ла баштары менән уйлаһындар ине.* М. Тажи. *Мейестән талғын йылы бәрә. Күңелдә лә шундай йылылыҡ.* Б. Бикбай. / Айырым бер сифат йәки үҙенсәлекте билдәләп күрһәткәндә әйтелә. *Тулы ҡойроҡ, ялбыр ял өйөр һаҡлар айғырлы — бына шундай Уралым* (Ҡобайырҙан). / Эйәрсен һөйләмдәге ниндәй һүҙе менән бәйләнешкә инеп, уны баш һөйләмгә бәйләй.

**2.** Фекерҙе сисеп, баҫым яһап әйткәндә ҡулланыла. *Һалдаттар араһында шундай хәбәр таралды: тентеү була, имеш, кемдән таланған нәмә*

*сыкһа, шул кеше полевой судка бирелә, имеш!* Д. Юлтый.

**3.** *киҫ. мәғ.* Сифат алдында килеп, уның мәғәнәһен көсәйтә; бик. *Шундай аҡыллы. Шундай зифа. Шундай инсафлы. Шундай матур. Шундай һыуыҡ.*

● *Дуҫың ниндәй — үҙерең шундай.* Мәҡәл.

**ШУНДАЙЫН** *киҫ. һөйл.* Сифат төшөнсәһен көсәйтә; бик, үтә; шул тиклем. *Шундайын матур. Шундайын аҡыллы.* ■ *Шундайын шәп баҫсаға .. кемдең күҙе ҡыҙмаһын?!* А. Ғирфанов.

**ШУНДУҠ** *р. һөйл.* Бик тиҙ, шунда уҡ. *Аһ .. тиһәң, шундуҡ бөтә сабырың.* Ш. Бабич.

**ШУНЛЫҠТАН** *бәйл.* Баш һөйләм менән сәбәп эйәрсен һөйләмде бәйләп килә; шул сәбәпле, шуның өсөн. *Бик эстәре көйә малайҙарҙың шунлыҡтан улар асыуҙарын Тимерҙән ала башланылар.* Б. Бикбай.

**ШУНСА** *р.* Билдәле бер һан, күләм иҫәбенә тоҫҡағанда ҡулланыла; шул тиклем. *Ватан һуғышына киткәнсе, күтәрҙеләр йөгөн колхоздың. Күпме ауыр булһа йөктәре, шунса мыҡты үҫте уҙҙәре.* К. Кинйәбулатова.

**ШУНСАМА** *р. диал.* Шул тиклем, шул хәтле, күп. *Шунсама кеше. Шунсама һум акса.* ■ *[Аҡшәһәр ҡарсыҡ:] — Ул заманда балаларыбыҙҙы уҡытҡан әҙәм бөгөн, шунсама йылдар уҙғас, беҙҙең өйгә ҡабат инер, тип уйыма ла килтергәнем юҡ ине.* С. Ҡудаш.

**ШУНҺЫҘ** *билд. а.* Нимәнелер эшләмәй, ҡылмай тороп; шунан башҡа. *Бында бер генә нәмә: теге Сәйәхте бөтөрөргә кәрәк. Шунһыҙ ил таланыуҙан тыныслай алмаҫ.* Т. Хәйбуллин.

**ШУҢАРСА** *р. һөйл.* Шуға тиклем, шуға саҡлы, шуға ҡәҙәр, шуғаса. *Шуңарса ял итеү. Шуңарса эшләй тороу.*

♦ **Шуңарса булмай** күп тә үтмәй, шунда уҡ; шул ике арала, унынса булмай. *Шуңарса булмай ямғыр яуып ебәрҙе.*

**ШУПАН** *с. диал.* Ауыр кәүҙәле, лупыш.

**ШУПЫРҘАУ** *к. диал.* Сыптырлау. *Шупырҙаған тауыш.* ■ *Ҡуйы таллыҡ араһында йылғаның таштары бәрелеп шупырҙауын ишеткәс, аттар текә яр аҫтына кемуҙарҙан сабып төштөләр.* Ш. Янбаев.

**ШУР**[1] [*фарс.*] *и.* **1.** Минераль һыу.

**2.** *диал.* Юшҡын. *Шур ултырған.*

♦ **Шур тоҙ** *шул уҡ* **шыр тоҙ** (*ҡар.* **шыр**[2] 1).

**ШУР**[2] *и. диал.* **1.** Ҡырҡындыла үҫкән йәш ағас. *Малдар шур араһына инеп китте.*

**2.** Ҡайын олонона үҫкән ҡаты бәшмәк; ҡыуау.

♦ **Шур тапар** бер йыл ял итеп, икенсе йыл һөрөлгән ер.

**ШУРА** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Һайланған йәки тәғәйенләнгән кешеләрҙән тороп етәкселек хоҡуғына эйә булған дәүләт органы; совет. *Милли шура. Хәрби шура. Шура ағзаһы.* ■ *Бында [вокзалда] беҙҙе хәрби шура ағзаһы Ворошилов менән шәреҡ фронтының командиры Фрунзе иптәштәр ҡаршы алды.* Ш. Хоҙайбирҙин. *Ырымбурҙа һәм Өфөлә башҡорт съездары булып үтте. Унда Башҡорт өлкә шураһы төҙөлдө.* Ф. Иҫәнғолов.

**ШУРҠ-ШУРҠ** *оҡш.* Ҡуйы шыйыҡлыҡ сайпылғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; шулк-шулк. *Шурҡ-шурҡ итеү. Шурҡ-шурҡ килеү.*

**ШУРҠЫЛДАТЫУ** *к.* Шурҡ-шурҡ иттереү; шурҡ-шурҡ килтереү.

**ШУРҠЫЛДАУ** *к.* Шурҡ-шурҡ итеү, шурҡ-шурҡ килеү.

**ШУРП-ШУРП** *оҡш.* Һыулы бушаҡ аяҡ кейемен кейеп атлағанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шурп-шурп итеү. Шурп-шурп килеү.*

**ШУРПЫЛДАУ** *к. һөйл.* Шурп-шурп итеү; шурп-шурп килеү. *Аяҡҡа һыу үтте, итек шурпылдығы сыға.*

**ШУРФ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Ҡаҙылма байлыҡты эҙләү, тикшереү өсөн ер аҫтына ҡаҙып төшкән юл. *Шурф ҡаҙыу.* ■ *Халыҡ алтын эҙләүҙән туҡтаманы. Яңынан-яңы урынға күсеп йөрөнөләр. Шурф артынан шурф ҡаҙҙылар.* Я. Хамматов.

**ШУТҺЫҘ** *с. һөйл.* Иҫәбе булмаған, күп. *Ҡош-ҡорттарының иҫәбе юҡ, шутһыҙ. / күсм.* Иҫәп-хисап белмәгән; аңра. / Әрләгәндә әйтелә.

**ШҮКТӘ** *с. диал.* Йүнһеҙ, булдыҡһыҙ. *Шүктә кеше.*

**ШҮМӘН**[1] *и.* **1.** Ҡабыҡтан йәки талдан үреп яһаған тәпәшәк алап (мал тиҙәге, әүрәү ташыу өсөн ҡулланыла).

**2.** Ҡабыҡты йәки мал тиҙәген туңдырып яһаған сана. *Шүмән шыуыу.* ■ *Боҙҙан ат тиҙәге ҡушып туңдырып яһаған түңәрәк шүмән менән ҡалҡыулыҡтан шыуып киттеңме — саналағы кеүек тупа-тура бармайһың, әйләнеп-әйләнеп китәһең,* С. Агиш.

♦ **Тишек шүмәнгә ултыртыу** алдау, һәмәйтеү.

**ШҮМӘН**[2] *и.* Утын яра торған ҡалын балта; калун. *Шүмән менән утын ярыу.*

**ШҮМӘНЛӘҮ** *к. диал.* Аушаңлау, аушан-таушан килеп атлау.

**ШҮНӘ**[1] [*рус.* чуни] *и. иҫк.* Ҡойоп эшләгән ҡалын резина калуш. *Шүнә кейеү.* ■ *[Рахмай:] Аяҡтағы шүнәнән һыу инә. Өшөттөрә.* К. Кинйәбулатова.

**ШҮНӘ**[2] *и. диал.* Ишелгән киндер еп.

**ШҮҢКӘТМӘ** *с. диал.* Аҡһаҡ, сатан. *Шүңкәтмә кеше.*

**ШҮРЕ** *и. диал.* Сүре. *Шүренең ебе бөттө.*

**ШҮРКӘ** *и.* Дөйә ҡамыты.

**ШҮРЛЕК** *и.* Төрлө нәмә һалыу өсөн стенаға беркетеп яһаған буй таҡта; кәштә. *Китап шүрлеге. Һауыт-һаба шүрлеге.* ■ *Ғәделәндең ғәҙәте шулай инде — эш хаҡы алған һайын шүрлектә яңы китаптар арта.* Ә. Байрамов.

♦ **Әпәй шүрлегенә менеп төшөү** ауыҙға ныҡ итеп һуғыу; ауыҙға ҡундырыу. *Юлай Әпрәйҙең әпәй шүрлегенә бер менеп төштө. Малайҙың ирендәре күбеп сыҡты, танауынан ҡан китте.* И. Ғиззәтуллин.

**ШҮРӘКӘ** *и. диал. ҡар.* **сүрәкә**[2].

**ШҮРӘЛЕ** *и.* **1.** Халыҡ ышаныуынса, кешеләрҙе ҡытыҡлап үлтерә торған, урман төпкөләндә йәшәгән мифик зат. *Шүрәле оҙон итеп үгеҙ тауышы менән аҡырҙы, уның тауышына бөтә тәне оҙон йөн менән ҡапланған, ике иң башына ат башындай имсәктәрен һалған инә шүрәле килде, ти* (Әкиәттән).

**2.** Кешегә әрләп әйтелә.

**ШҮРӘҢКЕ** *и. диал.* Сураҙай балаһы. *Ҡармаҡҡа шүрәңке эләккән.*

**ШХУНА** [*рус.* ‹ *ингл.*] *и.* Ике йәки өс мачталы елкәнле кәмә. *Шхуна мачтаһы.* ■ *Был сак инде ярға яҡынлаша тәрәндәге ап-аҡ елкәндәр. Балыҡсылар ауҙан ҡайта шхуна тулы балыҡ тейәлгән.* Ғ. Сәләм.

**ШЫБАҒА** *и.* **1.** Кемгәлер тәғәйенләнеп, уға бүлеп бирелә торған нәмә; өлөш. *Шыбаға алыу. Шабаға сығарыу.* ■ *[Һәүбән] кош-йәнлектән күп һунар алған, Тарауыл ҡартҡа шыбаға сығарып биргән «*Аҡбуҙат*»*. .. *Былбыл оса ҡулдан, толпар саба, сыға шыбағама бер ишәк* (Бәйеттән). **Шыбаға һөйәге** өмәселәргә өлөш итеп бирелгән ит киҫәге.

**2.** Бау, таяҡ кеүек оҙон нәмәне бер-бер артлы ус аялап тотоп, тейешле өлөш йәки урынды билдәләй торған ысул. *Шыбаға тотошоу.* ■ *[Фазыл:] Әйҙә, улай булғас, шыбаға тотошабыҙ. [Ирйегет:] Әйҙә, тотошабыҙ. Кем оска сыкһа, шул кеше буләген Гөлшатка бирә.* С. Мифтахов. *Көрәшселәр майҙанға сыға. Шыбаға тотола.* Р. Солтангәрәев.

**ШЫБАҒАЙ** *и. диал.* Баҡан.

**ШЫБАҒАС** [1] *и.* Оҙон һапҡа сылбыр менән тағылған туҡмаҡтан ғибәрәт элекке ашлыҡ һуғыу ҡоралы; тәпәс. *Шыбағас менән һуғыу.* ■ *Эй көслө булған ул Кәримә эбей. Уны бала сакта уҡ ирҙәр менән бергә бесән сабып, шыбағас менән шартлатып ашлыҡ һуғып йөрөгән, тиҙәр.* Р. Ғабдрахманов.

**ШЫБАҒАС** [2] *и. диал.* Сүре энәһе, епһә.

**ШЫБАЙ** *с. диал.* Шыптағай.

**ШЫБАҠ** *с.* Өҙлөкһөҙ яуып йәки ағып торған (ямғыр, тир, һыуға ҡарата). *Шыбаҡ ямғыр.* // *Шыбаҡ-шыбаҡ аға ҡар һыуы* (Халыҡ йырынан).

**ШЫБАҠШЫ** *и.* Ҡойоп яуған ямғыр.

**ШЫБАҠШЫУ** *к.* Бер туҡтауһыҙ, өҙлөкһөҙ яуып йәки ағып тороу (ямғыр, тиргә ҡарата). *Шыбаҡшып ямғыр яуа.* ■ *Юлдаштың сәс араларынан шыбаҡшып тир аҡты.* З. Биишева.

**ШЫБҮЛӘН** *и. диал.* Актамыр.

**ШЫБЫР** [1] *окш.* Ярма, ҡом һ. б. бөртөклө нәмәләр ҡапыл ҡойолғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шыбыр итеп ҡойолоу. Шыбыр итеп ҡалыу.*

**ШЫБЫР** [2]: **шыбыр тир** (*йәки* **һыу**) шыбаҡ-шыбаҡ аҡҡан тир; манма тир (йәки һыу). *Шыбыр тиргә батыу. Шыбыр тиргә төшөү. Шыбыр һыу булыу.*

**ШЫБЫРЛАТЫУ** *к.* Шыбыр-шыбыр иттереү. *Тирә-яҡта тынлыҡ диңгеҙе, ағас япраҡтарын шыбырлатып, һөйләштерҙе йыуаш төн еле.* Ғ. Мәсғүт.

**ШЫБЫРЛАУ** *к.* **1.** Шыбыр-шыбыр килеү, шым ғына шаулау. *Лавр япраҡтары шыбырланы, талғын ғына һалҡын ел иҫкәс.* Ғ. Әмири. *Елһеҙ генә көндә шыбырлайҙыр Бүртөшкәнкәй ҡулдең ҡамышы* (Халыҡ йырынан). / Хәл ҡылымдың *-п* формаһында килеп туҡтауһыҙ, өҙлөкһөҙ тигән мәғәнәне аңлата. *Шыбырлап ағыу. Шыбырлап ҡойоу.* ■ *Ике һалдат һәм сержант, Шечка оло юлға килеп еткәндә, ямғыр шыбырлап ҡойорға тотондо.* В. Исхаков. *Төлкөнән май шыбырлап аға, ти* (Әкиәттән).

**2.** Шыбыр-шыбыр итеп, шым ғына әйтеү. *Ҡолаҡҡа шыбырлау. Шыбырлап әйтеү. Шыбырлап һөйләшеү.* ■ *[Сафура:] «Ана, атайым килә»,— тип шыбырланы.* Һ. Дәүләтшина. *Ел туртҡайҙар ҡолағыма ниҙер шыбырлап китте.* А. Игебаев.

**ШЫБЫРЛАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **шыбырлау.** *Шыбырлашып һөйләшеү.* ■ *Кәли тәүге һүҙенән уҡ Сәхипгәрәйҙе маҡтай керешкәс, халыҡ шыбырлаша башланы. Аҙаҡ нәфрәттәрен йәшермәйенсә, күптәр асыҡтан-асыҡ ҡысҡырырға тотондо.* И. Ғиззәтуллин. *Ел юҡ, тик ҡарт ағастар ғына серләшкән һымаҡ бер туҡтауһыҙ тирбәлешеп шыбырлашалар.* З. Хисмәтуллин.

**ШЫБЫР-ШЫБЫР** *окш.* **1.** Туҡтауһыҙ ямғыр яуғанда, әкрен елгә япраҡ һелкенгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шыбыр-шыбыр ямғыр яуа.*

**2.** Үҙ-ара шым ғына һөйләшкән тауышты белдергән һүҙ. *Шыбыр-шыбыр һөйләшеү.* ■ *Орхоя менән Тәнзилә ҡолаҡҡа-ҡолаҡ һөйләшеп ултыралар. Улар шыбыр-шыбыр киләләр ҙә шырҡ-шырҡ көлөп алалар.* Ф. Иҫәнғолов.

**ШЫҒА** *и.* Иргә яҙҙа суртан тотоу шөғөлө. *Шығаға сығыу.*

**ШЫҒРЫМ** *р.* Төйгөсләп йәки ныҡып тултырған һымаҡ, туп-тулы, тығыҙ. *Китап менән шығрым тулы шкаф.* // *Шығрым булыу.* ■ *Өй эсе эҫе, бөркәү, халыҡ шығрым тулы.* Б. Ишемғол. *Бәләкәй генә өй эсе ҡунаҡтар менән шығрым тулды.* Я. Хамматов.

**ШЫҒЫР** *окш.* Ҡоро, ҡаты нәмәләр йәки күн эйбер бер-береһенә тейеп ышҡылғанда, ҡаты ҡар өҫтөнән атлағанда һ. б. сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шығыр итеү.* ■ *Ҡапҡа шығыр итеп асылыуға һанап һаныңа сыға алмаҫлыҡ мал бер-бер артлы мәкегә ҡарай ағыла башланы.* Т. Хәйбуллин.

**ШЫҒЫРЛАТЫУ** *к.* **1.** Шығыр-шығыр иттереү, шығыр-шығыр килтереү. *Теште шығырлатыу.* ■ *Зайлалов ултырған диванын шығырлатып, урынынан ҡуҙғала бирел ҡуйҙы.* Н. Мусин.

**2.** Хәл ҡылымдың *-а, -п* формаһында бик ныҡ, ҡаты итеп тигән мәғәнәне аңлата. *Шығырлатып атлау.* ■ *Рәхим ағай .. ҡарт атына шығырлатып бер ылау бесән тейәй ҙә баҙарға бара.* Ш. Шәһәр.

**ШЫҒЫРЛАУ** *к.* Шығыр-шығыр итеү, шығыр-шығыр килеү. *Ишек шығырлай. Шығырлап торған яңы итек.* ■ *Иҙән таҡталары мәйшелдәп, шығырлап ята.* Ғ. Дәүләтшин.

**ШЫҒЫРЛАУЫҠ(ЛЫ)** *с.* Шығыр-шығыр килгән, шығырлап торған. *Иштуғандың аяғында шығырлауыҡлы ҡара штиблет, өҫтөндә ҡыҫҡа күн тужурка.* З. Биишева.

● *Шығырлауыҡ ағас ҡырҡ йыл ултырыр.* Мәкәл. *Шығырлауыҡлы ағас оҙаҡ сыҙар, шығырламаған тиҙ һынар.* Мәкәл.

**ШЫҒЫР-ШЫҒЫР** *окш.* Ҡабат-ҡабат шығыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шығыр-шығыр итеү.* ■ *Тик ҡар ғына шығыр-шығыр итте, береһе ҡуйғас аяҡ ҡуҙғатып.* К. Кинйәбулатова.

**ШЫЖ** [1] *и. диал.* Аҡ шыршы.

**ШЫЖ** [2] *окш.* Ҡыҙған тимергә һыу тамғанда сыҡҡан йәки шуға оҡшаған тауышты белдергән һүҙ; саж.

**ШЫЖҒАТ** *и. диал.* Шырпы ҡабы, сыйғыс.

**ШЫЖЛАТЫУ** *к.* **1.** Шыж иттереү, шыж-шыж килтереү. *Салғылар .. ялт-йолт итә, уләнде шыжлатып киҫеп үткән тауыштары үҙе бер йәйге моң булып әллә ҡайҙарға тарала.* Ф. Рәхимғолова. **Самауырҙы шыжлатыу** ҡуҙ һалып яңынан ҡайнатыу, яңыртыу. *[Хәлкәс:] Илгизәр, бар улым, утынлыҡтан тап-топ йыйып килтер. Самауырҙы шыжлатып ебәрәйек.* Ш. Бикҡол.

**2.** *кусм.* Хәл ҡылымдың *-п* формаһында бик тиҙ, тиҙ генә тигән мәғәнәне аңлата. *Шыжлатып барып килеү.*

**ШЫЖЛАУ** *к.* **1.** Шыж итеү, шыж-шыж итеү, шыж да шыж килеү. *Самауыр шыжлай. Сана шыжлап бара.* ■ *Ялтыр боҙ шыжлай аяҡ аҫтында, шат йырҙар яңғырай алыҫ алыҫҡа.* Н. Иҙелбай. *Шыжлап ҡоймаҡ бешкән, боҫ борҡотоп самауыр ҡайнаған* (Әкиәттән).

**2.** *кусм.* Хәл ҡылымдың *-п* формаһында бик тиҙ, тиҙ генә тигән мәғәнәне аңлата. *Машиналар шыжлап үтеп тора.*

**ШЫЖ-ПЫЖ, шыж да пыж** *окш. кар.* **шыж-шыж.** *Шыж-пыж итеү.* ■ *.. Баянан бирле шыж-пыж килеп, аҡ пар бөркөп тороусы паровоз һуҙып ҡыҫҡыртты.* Д. Исламов.

**ШЫЖ-ШЫЖ, шыж да шыж** *окш.* Ҡабат-ҡабат шыж иткән тауышты белдергән һүҙ; саж-саж. *Шыж да шыж килеү. Шыж-шыж утын бысыу.*

**ШЫЖЫЛДАТЫУ** *к.* Шыж-шыж иттереү, шыж да пыж килтереү. *Шыжылдатып ҡоймаҡ ҡойоу.* ■ *Кәләшеңде мыҫҡыл итер сырылдатып, бәпесеңде утҡа атыр сыйылдатып, ҡош-ҡортоңдо ҡурҙаҡ итер шыжылдатып, шул дошманды ҡырмайынса ҡайтма, улым!* Р. Ниғмәти.

**ШЫЖЫЛДАУ** *к.* Шыж-шыж итеү, шыж да шыж килеү. *Табала май шыжылдай.* ■ *Тегендә лә бында ла гөрҫләп ағастар ауа. Бер туҡтауһыҙ балталар туҡылдай, бысҡылар шыжылдай.* Р. Ғабдрахманов. *Ҡыҙ уны [балыҡты] алып ҡайтып, таҙартып, шыжылдап торған майлы табаға һала* (Әкиәттән).

**ШЫЙ**[1] *окш.* Һыйғыр, яҫы нәмә һауаны ҡапыл ярып үткәндә йәки ышҡылып киткәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шый итеп ҡалыу. Шый итеп үтеү.* ■ *[Бурылдың] янбаш өҫтөнән тал сыбыҡ шый итеп һыҙғырып та ебәрҙе.* С. Агиш.

**ШЫЙ**[2] *киҫ. диал. кар.* **шыр**[2] 2. *Шый аңһыҙ кеше. Шый наҙан. Шый ҡурҡаҡ.*

**ШЫЙҒАҠ** *с.* Тайып, шыйғалап тороусан; тайғаҡ, шыма. *Шыйғаҡ ер. Шыйғаҡ юл.*

**ШЫЙҒАҠЛАУ** *к.* Шыйғаҡҡа, тайғаҡҡа әйләндереү; шыйғаҡ итеү. *Ямғыр яуҙы, аяҡ аҫтын шыйғаҡланы.*

**ШЫЙҒАЛАҠ** *с.* Аяҡты тотмаған, шыуып торған; тайғаҡ, шылғаяҡ. *Шыйғалаҡ юл.* // *Шыйғалаҡҡа әйләнеү.* ■ *Шыйғалаҡ тимер баҫҡыстан менгәндә Хисмәтулла йығыла яҙҙы.* Я. Хамматов.

**ШЫЙҒАЛАҠЛАНЫУ** *к.* Шыйғалаҡҡа әйләнеү, шыйғалаҡ булыу. *Шыйғалаҡланып тороу.* ■ *Ҡоро саҡта ҡеҙимге тап-таҡыр юл, мулыраҡ ысыҡ төшһә лә, йүкәһен һыҙырып алған һалабаш ҡабығынан да яман, шыйғалаҡланып тик ята.* Ш. Янбаев.

**ШЫЙҒАЛАҠЛАУ** *к.* Шыйғаҡ, тайғаҡ итеү; шыйғалаҡҡа әйләндереү. *Юлды шыйғалаҡлау.*

**ШЫЙҒАЛАТЫУ** *к.* Тайғаҡ ерҙән шыуҙырыу. *Сананы шыйғалатып ебәреү.*

**ШЫЙҒАЛАУ** *к.* Тайғаҡ ерҙән шыуып китеү, шыуыу.

**ШЫЙҘА** *и.* Кәртәлек нәҙек оҙон шыма ағас; һайғау.

**ШЫЙҘАН** *с.* **1.** Төп-төҙ булып үҫкән, ботаҡһыҙ, оҙон. *Шыйҙан ағас.* ■ *Аҡ ҡайындар, шыйҙан ҡарағайҙар, йәй бал еҫе бөркөп ултырған йүкәләр, йөҙ йәшәр имәндәр үҫкән ҙур парк күләгәһендә бер йорт бар.* «Ағиҙел», 1979, № 5.

**2.** *и. мәғ. кар.* **шыйҙа.**

**ШЫЙҘАҢЛАУ** *к. диал.* Һуйҙаңлау. *Шыйҙаңлап йөрөү.*

**ШЫЙҘЫРМА** *и. диал. кар.* **типке**[1]. *Шыйҙырма ҡуйыу.*

**ШЫЙЛА** *с. кар.* **шыйыҡ** 4. *Шыйла тал.*

**ШЫЙЛАТЫУ** *к.* **1.** Шый-шый иттереү, шый-шый килтереү. *Үткәр салғым уләндәрҙе шыйлатып бара киҫеп. Бәшмәктәр ҙә баш әйәләр, эшләпәләрен сисеп.* М. Дилмөхәмәтов.

**2.** *кусм.* Хәл ҡылымдың *-п* формаһында бик тиҙ, тиҙ генә тигән мәғәнәне аңлата. *Шыйлатып барып етеү. Шыйлатып үтеп китеү.* ■ *Гүзәлдең мотоциклы Ташлытау яғынан шыйлатып үтеп китте лә Аййылға буйлап түбән китте.* И. Ғиҙзәтуллин.

**ШЫЙЛАУ** *к.* **1.** Шый-шый итеү, шый-шый килеү. *Шыйлап тороу.* ■ *Һәр бер һыҙғырып килгән снаряд, шыйлап, үкереп килгән мина һинең өҫтөнә төбәп килгән шикелле тойола.* Б. Дим.

**2.** *кусм.* Хәл ҡылымдың *-п* формаһында бик тиҙ, елеп тигән мәғәнәне аңлата. *Шыйлап уҙып китеү.* ■ *Ока буйҙарын үткәс, поезд Рязанда саҡ ҡына туҡталып торҙо ла артабан елде. Унан ары ул станцияларҙа туҡталып та торманы, шыйлап барыуын дауам итә.* Ғ. Ғүмәр.

**ШЫЙТ** *окш.* Нимә менәндер һыҙыра һуҡҡанда, һыйғыр сыбыҡты һелтәгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шыйт итеү. Шыйт иттереп һыҙыра тартыу.*

**ШЫЙТЛАТЫУ** *к.* Шыйт иттереү. *Тал сыбығы менән шыйтлата һуғыу.*

**ШЫЙТЛАУ** *к.* Шыйт итеү, шыйт-шыйт итеү, шыйт-шыйт килеү. *Шыйтлап тороу.* ■ *Ҡамсы шыйтлап Ғәззәнең билен ураҡан. Ат дөрөп алып киткән.* Ф. Иҫәнғолов.

**ШЫЙТ-ШЫЙТ, шыйт та шыйт** *окш.* Ҡабат-ҡабат шыйт иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шыйт-шыйт итеү. Шыйт та шыйт килеү.*

**ШЫЙТЫҠ** *с. һөйл.* **1.** Һығылып-бөгөлөп торған, йомшаҡ, шыйыҡ. *Шыйтыҡ тал. Шыйтыҡ сыбыҡ.* ■ *Ямғыр килеп алҡаларын таға шыйтыҡ талдарға, ҡар елдәре, өйөрөлөп, һуҡлығалар туң ярға.* Х. Назаров. / *кусм.* Нығынып етмәгән, көсһөҙ. *Шыйтыҡ быуын. Шыйтыҡ бала.*

**2.** *кусм.* Шыма йөнлө, нәҙек оҙон аяҡлы, ҡаҡса кәүҙәле. *Шыйтыҡ тай. Шыйтыҡ мал. Ҡыр аты шыйтыҡ була.*

**ШЫЙТЫЛДАУ** *к.* Шыйт-шыйт итеү, шыйт-шыйт килеү. *Салғылар шыйтылдап, шыңғырап, ураҡтар ялтырап, яңғырап, эшләйҙәр ҡүмәкләп ер тулып, эшсе һәм игенсе бер булып!* Ғ. Амантай.

**ШЫЙ-ШЫЙ,** **шый ҙа шый** *окш.* Ҡабат-ҡабат шый иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шый-шый итеү. Шый ҙа шый килеү.*

**ШЫЙЫҒАЙТЫЛЫУ** *ҡ. ҡайт. ҡар.* **шыйығайтыу.** *Шыйығайтылған буяу. Шыйығайтылған кислота.*

**ШЫЙЫҒАЙТЫУ** *ҡ.* Шыйыҡ хәлгә килтереү; шыйыҡ итеү. *Ҡаймаҡты шыйығайтыу.*

**ШЫЙҒАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Шыйыҡ хәлгә килеү; шыйыҡ булыу. *Шыйығайған бал.*

**2.** Болот, томан кеүек нәмәнең таралыуына, асылыуына ҡарата әйтелә. *Таң алдынан .. ямғыр һибәләүе һирәгәйгән, күк йөҙөндә болоттар шыйығайған ине.* А. Таһиров.

**3.** *күсм.* Көс-хәлдән тайып, йомшарыу. *Төнө буйы керпек тә ҡағылманы. Шулай ҙа һыуҙа йөрөгәс, йөко килмәй, тик быуындар ғына шыйығайған.* Ф. Иҫәнғолов. *Бейеүселәрҙең хәлдәре бөттө. Унһыҙ ҙа шыйығайған быуындары баш бирмәй, аяҡтары күтәрелмәй башланы.* И. Насыри.

**ШЫЙЫҠ** *с.* **1.** Һыу һымаҡ ағырлыҡ хәлдә булған, ағып тороусан. *Шыйыҡ кислород.* ■ *Ер үҙәге иң ауыр матдәләрҙән тора. Был матдәләр унда шыйыҡ хәлдә ята.* Д. Бураҡаев.

**2.** Урта ҡуйылыҡ самаһынан кәм булған; күп һыулы. *Шыйыҡ аш. Шыйыҡ бутҡа. Шыйыҡ өйрә.* ■ *Һөт шыйыҡ булған өсөн гәйепте бесәй башына ауҙарыу әҙәм көлкөһө булыр.* Ш. Насыров. / *күсм.* Туҡлыҡһыҙ, һыулы. *Тау-урман зонаһының үҙенсәлеге — үлән шыйыҡ.*

**3.** Үтәнән-үтә күренеп, яҡтылыҡ үткәреп торған. *Шыйыҡ болот. Шыйыҡ томан. Шыйыҡ төтөн.* ■ *Шыйыҡ болоттар өҫтөнән ай көлә миңә ҡарап.* Н. Нәжми.

**4.** Һығылып-бөгөлөп торған; йомшаҡ. *Шыйыҡ сыбыҡ.* ■ *Ҡазый алдына һуҙылып ятам да, уның шыйыҡ тал сыбығы менән арҡаға саж--саж һуҡҡанын көтәм.* М. Ғафури. / *күсм.* Ныҡ ғынып етмәгән; көсһөҙ. *Кәүҙәгә шыйыҡ кеше. Быуыны шыйыҡ.*

**5.** *күсм.* Эшкә, тормошҡа анһат ҡараған еңел холоҡло. *Шыйыҡ кеше.*

◆ **Өйө бейек, өйрәһе шыйыҡ** байлыҡ, төҙөклөк күҙгә ташланып торһа ла, ашау-эсеү яғы насар булғанда әйтелә. *Әйе, өйө бейек, өйрәһе шыйыҡ тигәндәй, өй булған менән кәртәлә ҡолаҡ ҡыбырлатҡандай мал юҡ, ашар-эсәргә лә бөткән.* К. Мәргән.

**ШЫЙЫҠЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Шыйыҡҡа (1—3 мәғ.) әйләндереү, шыйыҡ итеү, шыйыҡлау. *Ҡаймаҡты шыйыҡландырыу.*

**ШЫЙЫҠЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **шыйыҡлау.** *Шыйыҡланған ҡатыҡ.*

**2.** Урта ҡуйылыҡ самаһынан ҡайтыу, шыйыҡ хәлгә килеү. *[Шаҙағай:] Шыйыҡланып, бутҡаға әйләнгән шыяны тотоп булмай.* Т. Хәйбуллин.

**3.** Таралып асылыу; һирәгәйеү. *Болот шыйыҡлана.* ■ *Урман ситендәге имәнлектә аҡ ҡаршауҙай томан һуҙыла. Йә ул шыйыҡлана, йә ҡуйыра, тоноҡ һыуҙай тонып һыҙыла.* Я. Ҡолмой.

**4.** *күсм.* Көс-ҡеүәте кәмеп, насарланыу. *Склероз сире әләкте, шыйыҡланды хәтерем.* Т. Арслан.

**ШЫЙЫҠЛАТЫУ** *ҡ.* Шыйыҡҡа (1, 2 мәғ.) әйләндереү, шыйыҡ хәлгә килтереү. *Айран шыйыҡлатыу.*

**ШЫЙЫҠЛАУ** *ҡ.* Һыу ҡушып шыйыҡ (2 мәғ.) хәлгә килтереү; шыйыҡ итеү. *Бисәһе әле генә ҡоҙоҡтан алып ҡайтҡан һалҡын һыуға айран шыйыҡлап сығарҙы.* Ә. Вәли.

**ШЫЙЫҠЛЫҠ** *и.* Аға торған һәм үҙе һалынған һауыт формаһын ҡабул иткән матдә. *Шыйыҡлыҡҡа әйләнеү. Шыйыҡлыҡ хәлендә булыу.* ■ *Шыйыҡлыҡ үҙенең формаһын үҙгәртә, ләкин күләмен һаҡлай.*

**ШЫЙЫҠСА** *и.* Төрлө иретмә ҡатнашҡан ҡатмарлы төҙөлөшлө шыйыҡлыҡ. *[Башҡорттар] нефтте һөткә ҡушып ҡайнатып, ҡаймаҡ һымаҡ шыйыҡса әҙерләгәндәр һәм .. эс ауыртҡанда шуны эскәндәр.* Д. Бураҡаев.

**ШЫЙЫЛДАҠ** *и. диал.* Сүрәгәй өйрәк. *Шыйылдаҡ ояһы. Шыйылдаҡ балаһы.*

**ШЫЙЫЛДАТЫУ** *ҡ.* **1.** Шый-шый иттереү, шый-шый килтереү. *Мәғфүрә бысаҡты ҡаҙан ситенә шыйылдатып, бер ниҫә тартып яныны ла Рәхимәгә кире һуҙҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Хәл ҡылымдың *-п* формаһында бик тиҙ, елдереп тигән мәғәнәне аңлата. *Шыйылдатып сығып китеү.* ■ *Такси менән шыйылдатып барып төштөк.* Д. Исламов.

**ШЫЙЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Шый итеү, шый-шый итеү, шый ҙа шый килеү. *Юлдың иҙмә балсығы шыйылдап, тәгәрмәскә уралып, сат йәбешеп ята.* З. Биишева. *Бер ҡаҙаҡ ҡылысын болғап ҡуйҙы. Ялтырауыҡлы ҡылыс шыйылдап Рәхим ағайҙың ҡолағы янынан үтте.* Ш. Шәһәр.

**2.** *күсм.* Хәл ҡылымдың *-п* формаһында ҙур тиҙлек менән, бик шәп тигән мәғәнәне аңлата. *[Бөркөт] .. ҡанаттарын йыйып, тырнаҡтарын тарбайтып, йәшен тиҙлеге менән шыйылдап түбәнгә шыуыя.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ШЫЙЫЛДЫҠ** *с.* Шый-шый иткән, шый-шый итеп торған. *Шыйылдыҡ тауыш.* ■ *[Хәйрулла] үҙенә хас булмаған, әллә ниндәй йәмһеҙ, шыйылдыҡ тауыш сығарып көлөп тә ҡараны.* М. Тажи.

**ШЫЙЫРТЫУ** *ҡ. һөйл.* **1.** Орошоу, ҡыҙҙырыу. *Шыйыртып алыу.* ■ *Әһә, булды, мин әйтәм, быға барыһын да әнәһенән-ебенә тиклем һөйләп бирәйем. Шыйыртһын әле быларҙы.* Р. Ҡотошов.

**2.** *күсм.* Хәл ҡылымдың *-п* формаһында бик һәйбәт, бик яҡшы тигән мәғәнәне аңлата. *Урманда мастер булып, шыйыртып эшләй.* М. Тажи.

**ШЫЙЫРЫУ** *ҡ. һөйл.* **1.** Ныҡ орошоу, ҡыҙҙырыу.

**2.** Ныҡ туҡмау; бешеү. *Шыйыҡ сыбыҡ менән шыйырыу.*

**ШЫЙЫУ** *ҡ. һөйл.* **1.** Тыйыу, шыуыу. *Аяҡ шыйып китте.*

**2.** *күсм.* Тиҙ генә китеү; шылыу, тайыу. *Шыйыу ягын ҡарау. Уйнарға шыйыу.*

**ШЫҠ** *окш.* **1.** Ҡаты нәмә ҡаты нәмәгә ҡапыл тейгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шыҡ итеп бәрелеү. Шыҡ итеп ҡалыу.* ■ *[Котелок] шыҡ итеп ташҡа тейҙе.* Ә. Вахитов.

**2.** *р. мәғ.* Тура, төҙ (аҙымға ҡарата). *[Айбулат] .. яурындарын артҡараҡ ташлап, шыҡ баҫып атлап бара.* Һ. Дәүләтшина.

**ШЫКА** *р.* **1.** Таш һымаҡ булып (ҡатыу йәки туңыу). *Аттар кире ҡайтҡан. Күсер .. санала шыка туңған.* Я. Хамматов.

**2.** Күҙенән, өймәләмә. *Шыка тулы. Шыка һалыу.*

**ШЫКАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Төҙгә ҡатыу. *Шыкайып тороу.*

**2.** Хәл ҡылымдың *-а, -п* формаһында төп-төҙ, туп-тура булып тигән мәғәнәне аңлата. *Шыкайып ҡатыу. Шыкайып туңыу. Шыкайып атлау.*

**3.** *диал.* Сығып тайыу, шылыу. *Сынбулатҡа оят булды. Күҙен йәшерергә урын тапмаған, тиҙерәк шыкайыу яғын ҡараны.* М. Тажи.

**ШЫКАЛАМА** *р. диал.* Шығрым. *Шыкалама булыу. Шыкалама тулыу.*

**ШЫКАЛЫУ** *ҡ. диал.* Туп-тулы булыу, шығрым тулы булыу.

**ШЫКАЯ** *р. һөйл.* Төп-төҙ, туп-тура булып. *Шыкая баҫыу. Шыкая тороу.* ■ *Әнә бит, Ерән ҡашҡа ла аҡлан ситендә, ниҙер һиҙгәндәй, шыкая ҡатып, тып-тын баҫып тора.* Й. Солтанов.

**ШЫКРАЙТЫУ** *ҡ.* **1.** Нык ҡатыға әйләндереү, ҡап-ҡаты итеү. *Шыкрайтып туңдырыу.*

**2.** *күсм.* Хәл ҡылымдың *-а, -п* формаһында бик нык ҡыҫып, ҡуҙғалмаҫлыҡ итеп тигән мәғәнәне аңлата. *Билде шыкрайта быуып ҡуйыу.* ■ *Улар аттарының ауыҙлыҡтарын шыкрайта тартҡандар ҙа, үҙҙәренең баштарын артҡараҡ ташлап ҡарап торалар.* Һ. Дәүләтшина.

**ШЫКРАЙЫУ** *ҡ.* Нык ҡатыға әйләнеү, ҡап-ҡаты булыу. *Шыкрайып ҡатыу.* ■ *Шыкрайып туңған ҙур йылғаның аръяғында — ҡала.* С. Кулибай. *Мейесте һырып алабыҙ ҙа шыкрайып ҡатҡан, хатта йүнләп яҙа ла алмай башлаған ҡулыбыҙҙы йылытырға тотонабыҙ.* Н. Мусин.

♦ **Шыкрайып торған** бик көслө, ҡаты, ыжғыр (һыуыҡҡа ҡарата). *[Әсәй һин] шыкрайып торған февраль һыуығында, яртылаш юлды йәйәүләп, бер тоҡ икмәк күтәргән көйө, ҡалаға беҙҙең училище ятағына арманһыҙ булып килеп йығылғайның.* Ф. Иҫәнғолов.

**ШЫКҺЫҘ** *с.* **1.** Һыны, рәүеше килешһеҙ; ҡотһоҙ, йәмһеҙ, шөкәтһеҙ. *Шыкһыҙ ауыл. Шыкһыҙ дала.* ■ *Нурияны ватыҡ ҡапҡа һәм таҡта менән ҡаҙаҡланған ишек ҡаршыланы. Өй эсе шыкһыҙ, күңелһеҙ, ялanғас күренде.* К. Мәргән. *Ҡоролоҡ йылдарҙа дала айырыуса шыкһыҙ була.* З. Биишева. / Буй-һыны, килбәте йәмһеҙ булған. *[Мәскәй әбей] шыңшып кына килгән бер шыкһыҙ малайға тап булды, ти* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Күңелгә ятмаған, шом уятҡан; күңелһеҙ, йәмһеҙ. *Шыкһыҙ уй. Шыкһыҙ һүҙ.* ■ *Ниндәйҙер моңһоҙ, ҡоро ғына бер көй сығара ул [Зифа апай] .. Бер аҙҙан ул һыҙғырыныуҙан мөңгөрәүгә күсә. Шул уҡ шыкһыҙ көй.* К. Мәргән.

**ШЫКҺЫҘЛАНЫУ** *ҡ.* Шыкһыҙға (1 мәғ.) әйләнеү, шыкһыҙ булыу. *Шыкһыҙланып ҡалыу.* ■ *Бульварҙағы ағастар үҙҙәренең ялanғасланып, шыкһыҙланып ҡалыуҙарына зар илаған һымаҡ, йәш сыбыҡтары менән тауыш сығарып шаулайҙар.* З. Ғәлимов.

**ШЫК-ШЫК, шык та шык** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат шыҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шык та шык килеү.* ■ *Тештәре шык-шык итә, биттәр күгәргән — нәк үлек!* Д. Юлтый.

**ШЫКЫ** *с. диал.* **1.** Һаран, йомошҡа ҡаты. *Шыкы кеше.*

**2.** Ҡупшыҡай, көйәҙ турғай. *Шыкы йылы яҡҡа китмәй.*

**ШЫКЫЙЫУ** [1] *ҡ.* Йомолоп, ҙур тиҙлек менән аҫҡа атылыу. *Шыкыйып төшкән самолёт. Бөркөт ҡош күреп шыкыйҙы. Шыкыйып килеү. Шыкыйып төшөү.* ■ *Альгис саңғыһының ҡайышын йүнәтәп эләктергән арала Алма тау аҫтына шыкыйып төшөп тә китте.* Ҡ. Ибәтуллин. *Аҡ ҡарсыға менән күк ҡарсыға шыкыйып та осоп талсыға* (Халыҡ йырынан).

**ШЫКЫЙЫУ** [2] *ҡ. диал.* Шыкрайыу. *Бик ҡаты һыуытып ебәрә лә буран ҡотора башлай .. Тәҙрәләр шыкыйып туңа.* Ә. Вахитов.

**ШЫКЫЙЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **шыкыйыу** [1]. *Шыкыйышып осоу.* ■ *Ҡул буйындағы йыуантыҡ тирәктәргә сәүкәләр өйөрө шыкыйышып килеп ябырыла ла, толҡа тапмағандай сарғауланып, кире ҡуҙғып китә.* «Ағиҙел», 1971, № 6.

**ШЫКЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Шыҡ-шыҡ иттереү, шыҡ-шыҡ килтереү. *Шыкылдатып тәҙрә сиртеү. Шыкылдатып баҫыу.* ■ *Анна Константиновна ашығыс рәүештә счет төймәләрен шыкылдатты.* С. Агиш.

**ШЫКЫЛДАУ** *ҡ.* Шыҡ итеү, шыҡ-шыҡ итеү, шыҡ-шыҡ килеү. *Шыкылдап тейеү. Шыкылдап тороу.* ■ *Гөлйөҙөмдөң ҡурҡыуы бөтһә лә, өшөгән кеүек, тештәре шыкылдап ҡалтырай ине.* Һ. Дәүләтшина. *Туфли үксәләре шыкылдамай кирҙә итектәре шикелле.* Ғ. Әмири.

**ШЫКЫЛЛЫ** *с. диал.* Матур ҡиәфәтле; һөйкөмлө, күрмәлекле. *Шыкыллы ҡыҙ.*

**ШЫКЫЛҺЫҘ** *с. диал.* Йәмһеҙ; һөйкөмһөҙ, күрмәлекһеҙ. *Шыкылһыҙ кеше.* ■ *Был шыкылһыҙ ҡарттың ҡайным буласағы күҙ алдыма килеп, йөрәгем шыу итеп китте.* Һ. Дәүләтшина.

**ШЫКЫМ** *с. диал. ҡар.* **шарҙыуан** 1. *Ул харап шыкым кеше ине. Теләһә кемгә ҡарата шаян йырҙар сығара торғайны.* М. Тажи.

**ШЫКЫР** *с. диал.* Һаран, йомошҡа ҡаты. *Шыкыр кеше.*

**ШЫКЫРЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** Шыҡыр-шыҡыр иттереү; шыҡыр-шыҡыр килтереү. *Теште шыкырлатыу. Шыкырлатып әйләндереү.*

**2.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында бик нык итеп, тигән мәғәнәне аңлата. *Фатима уның [Тимерҙең] ҡулын шыкырлатып ҡыҫты.* Б. Бикбай. *Ерҙе шыкырлатып туңдырған, сылтырашып ятҡан гөрләүектәрҙе боҙ менән ҡоршап ҡуйған.* Г. Юнысова. / Шул уҡ грамматик формала бер нигә ҡарамай, ҡайырып тигән мәғәнәне аңлата. *Хаҡ һорап тормабыҙ, шыкырлатып алырбыҙ.* Н. Ғәлимов. *..Был аҡсаны [ике меңде] тегеләй ҙә былай ҙа шыкырлатып ала инек. Бер ҙә булмаһа хеҙмәт көндәреңдән тотоп ҡалыр инек.* Д. Исламов.

**ШЫКЫРЛАУ** *ҡ.* **1.** Шыҡыр-шыҡыр итеү; шыҡыр-шыҡыр килеү. *Танк моторҙарының гөрләүе, гусеницаларының шыкырлауы ишетелде.* Ғ. Әмири. *[Мулла:] Тиктәҫкә түгел һайыҫҡан шыкырлауы.* Я. Хамматов.

2. *кусм.* Нимәнелер өҙмәй ҙә ҡуймай, телдәи төшөрмәй һөйләү. *[Солтангәле:] Күп шыҡырлаһалар, өйҙәрен үртәп тә китермен әле.* Я. Хамматов.

**ШЫҠЫРЛАШЫУ** *к.* Шыҡырлап тауыш бирешеү (һайыҫҡандарға ҡарата). *Һайыҫҡандар шыҡырлаша.* ■ *Ә мин бала саҡтан уҡ урманды яратам. Көҙөн иһә пыр-пыр осҡан селдәре, ҡышын шыҡырлашҡан һайыҫҡандары менән күңелемде ала.* М. Әһлиуллин.

**ШЫҠЫР-ШЫҠЫР** *оҡш.* Ҡытыршы ҡаты нәмәләр бер-береһенә ныҡ итеп ышҡылғанда, һайыҫҡан ғауғалап ҡыҫҡырғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шыҡыр-шыҡыр итеү. Шыҡыр-шыҡыр килеү. Майһыҙ тәгәрмәс шыҡыр--шыҡыр әйләнә.* ■ *Шыҡыр-шыҡыр һайыҫҡан, ник муйыныҡ бик ҡыҫҡа, ҡойроҡ оҙон шул кәҙәр? — Ташығанға ҡойроғомда етмеш төрлө буш хәбәр!* Ш. Мәхмүтов.

**ШЫҠЫРЫҠЛАУ** *к.* Шыҡыр-шыҡыр килеү, шыҡыр-шыҡыр иткән тауыш сығарыу (һайыҫҡанға ҡарата). *Һис туҡтауһыҙ шыҡырыҡлай — шундай ҡош ул һайыҫҡан.* С. Кулибай.

**ШЫЛАҒАЙ** *и. ҡар.* **һеләгәй.**

**ШЫЛАН** *и. диал.* Ҡырҡбыуын. *Һаҙ шыланы. Урман шыланы. Баҫыу шыланы.*

**ШЫЛБЫРТ** *с. диал.* Еңшек. *Шылбырт ҡар.*

**ШЫЛҒАҠ** *с.* Тайып, шылып торған, тайғаҡ. *Шылғаҡ юл. // Шылғаҡҡа әйләнеү.*

**ШЫЛҒАҠЛАНЫУ** *к.* Шылғаҡҡа әйләнеү, шылғаҡ булыу. *Шылғаҡланған юл.*

**ШЫЛҒАЯҠ** [1] *с.* **1.** Шыуып, шыйғалап торған; шыйғаҡ, тайғаҡ. *Шылғаяҡ юл. Шылғаяҡ боҙ. // Көҙгө шылғаяҡ.* ■ *Ямғырҙан һуң һары балсыҡ шылғаяҡҡа әйләнде.*

2. *и. мәғ. һөйл.* Конькиҙа йөрөү өсөн туңдырылған боҙ; каток. *Шылғаяҡ яһау. Шылғаяҡта шыуыу.*

**ШЫЛҒАЯҠ** [2] *с. һөйл.* Эш һөймәҫ елғыуар. *Шылғаяҡ кеше.* ■ *[Әлмисаҡ] дин битлеге аҫтында кеше алдап йөрөгән бер шылғаяҡ.* Б. Бикбай. *И ҡәләм, һин, үткер ҡәләм, осҡон бөркөп, сәсрәт сатҡы, ялҡауҙың тетмәһен тетеп, бюрократты дер һелкетеп, ныҡ ҡайыҙла шылғаяҡты.* А. Иҙелбаев.

**ШЫЛҒАЯҠ** [3] *и. диал.* Ҡайын ите, күшкә.

**ШЫЛҒАЯҠЛАНЫУ** [1] *к.* Шылғаяҡҡа, тайғаҡҡа әйләнеү, шылғаяҡ булыу. *Уйында бөтәһе лә ҡатнаштылар: аяҡтарына ток кейеп йүгерҙеләр, шылғаяҡланған бағанаға менделәр, футбол уйнанылар.* Ә. Бикчәнтәев.

**ШЫЛҒАЯҠЛАНЫУ** [2] *к. һөйл.* Елғыуарға әйләнеү.

**ШЫЛҒАЯҠЛАУ** *к.* Шылғаяҡҡа әйләндереү, шылғаяҡ, тайғаҡ итеү. *Юлды шылғаяҡлап бөткәндәр.*

**ШЫЛҒЫЙ** *р. диал.* Бөтөнләй, тамам. *Ағастар әнә төрткөһөҙ булып сыҡҡан да .. ботаҡлы олондары ер-береһенә үрелешеп, тар араны шылғый көмбәҙләп ҡуйғандар.* Т. Килмөхәмәтов.

**ШЫЛҒЫҺЫҘ: шылғыһыҙ булыу** *диал.* хәлдән тайыу; арманһыҙ булыу. *Һыу ташып, һыуға барып, шылғыһыҙ булам арып* (Халыҡ йырынан).

**ШЫЛДЫЙ-МЫЛДЫЙ** *р. һөйл.* Йәшертен-бошортон; аҫтыртын. *Шылдый-мылдый эшләү.*

**ШЫЛДЫРМА** *и. ҡар.* **шыуҙырма** 1. *Ҡаяк шылдырмаһы. Ишек шылдырмаһы.*

**ШЫЛДЫРШЫУ** *и.* Уйын исеме (түңәрәкл тубыҡ сәнсеп ултыралар; һамаҡлап бөгәр аҫты нан билғау йөрөтәләр; көтөүсе шул билғауҙ күреп алып аңғармаҫтан берәүһенә һуға; һуғы ған кеше билғауҙы тота һалып, үрә баҫыр тейеш; өлгөрмәһә, көтөүсе була). *Шылдыршы уйыны. Шылдыршыу уйнау.*

**ШЫЛДЫРЫУ** *к.* **1.** Нәмәне этеп йәки күт реп урынынан күсереү; шыуҙырыу. *Арҡа шы дырыу. Ситкә шылдырыу. Шылдырып ҡуйы* ■ *Ғәбит ағай ултырғысын шылдыра бире Юлайға яҡын килеп ултырҙы.* З. Биишева.

2. *кусм. һөйл.* Дөрөҫлөктән ситләштере алдау. *Шылдырып һөйләү.* ■ *[Ныязгол] ми белгәс ни, аҙ ғына шылдырып әйткәнде лә өҙ тотоп тик ултыра.* Һ. Дәүләтшина.

3. *кусм. һөйл.* Йәшереп, һорамай алыу; урлау, сәлдереү. *Илмырҙа төнөн килә лә, экрен гең бер күбәгә яҡын бесәнде шылдыра.* К. Мәргән.

♦ **Шылдырып арҡанлау** алдау. *Мине, ма лай тигәс тә, шылдырып арҡанлама, бабай. Күсереп арҡанлау атҡа ғына килешә.* И. Ғиззәтуллин.

**ШЫЛМАЯҠ** *с. диал.* Йылмаяҡ. *Шылмаяҡ кеше. // Шылмаяҡҡа әйләнеү.*

**ШЫЛТ** *оҡш.* **1.** Тимергә тимер ҡағылғанда йәки ҡапыл ыҫҡынып киткәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шылт итеү. Шылт итеп кеңә ыҫҡынды.*

2. *кусм.* Етеҙ хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Ишек асылған арала Яҡуп өйгә шылт.* Б. Бикбай.

♦ **Шылт иткән** саҡ ҡына ишетелгән, көсһөҙ, бик бәләкәй.— *Балаларҙы нык тый, шылт иткән тауыш булмаһын.* Ф. Иҫәнғолов. *Өй тын .. шылт иткән тауыш юҡ.* С. Агиш. **Шылт та итмәү** 1) саҡ ҡына ла тауыш сыҡмау; өнһөҙ-тынһыҙ булыу; 2) механизм, машина кеүек нәмәнең боҙолмай, туҡтамай эшләүенә ҡарата әйтелә. *[Кәримов:] Иртәнсәк көйләп ебәрәм [тракторҙы], үҙем туҡтатҡанса шылт та итмәй.* Ә. Вәли.

**ШЫЛТАЙЫУ** *к. һөйл.* Күренмәҫкә тырышыу, йәшенеү, ҡасыу. *Шылтайып йөрөү.* ■ *[Мохтар:] Йә, һин ни эшләп улай шылтайып ҡына, ситтән тәҙрәгә күҙ һалып йөрөйһөң?* С. Кулибай.

**ШЫЛТ-ШЫЛТ, шылт та шылт** *оҡш.* Ҡабат--ҡабат шылт иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шылт-шылт итеү. Шылт та шылт килеү.* ■ *Шофёр ағай беҙгә «фотокор» тоҫҡаны ла икс мәртәбә шылт-шылт иттереп төшөрөп алды.* Ф. Иҫәнғолов.

**ШЫЛТЫР** *оҡш.* **1.** Йоҡа тимер нәмәләр ҡойолғанда, бер-береһенә бәрелгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шылтыр итеү. Шылтыр итеп төшөп китеү.*

2. *с. мәғ.* Шылтырап аҡҡан, саф тауышлы; сылтыр. *Шылтыр шишмә кеүек тынлыҡ боҙған осрашҡанда ҡайнар ирендәр.* Ғ. Сәләм.

**ШЫЛТЫРАҠ** *и.* Шылтырата торған уйынсыҡ. *Балаға шылтыраҡ биреү.*

**ШЫЛТЫРАТЫУ** *к.* **1.** Шылтыр-шылтыр иттереү; шылтыр иткән тауыш сығарыу. *Ҡыңғырау шылтыратыу. Тәңкә шылтыратыу.* ■ *Сафуан ҡулындағы биҙәләрҙе шылтырата биреп ерге*

*куйҙы ла еңемдән тотто.* Т. Килмөхәмәтов. *Егет сыга ла йүгәнен шылтырата. Быга алама гына ат килә* ( Әкиәттән).

**2.** Телефон ярҙамында һөйләшергә саҡырыу. *Хашимов телефон трубкаһын алып, район башҡарма комитеты председателенә шылтыратты.* Б. Бикбай.

**ШЫЛТЫРАУ** *ҡ.* **1.** Шылтыр итеү, шылтыр-шылтыр килеү. *Шылтырап китеү.* ■ *Караулат эргәһеңдәге тәҙрә төбөндә торған будильник шылтырай башланы. Сәгиҙә уны тиҙ генә туктатты.* М. Тажи.

**2.** Саҡырып, тауыш биреү (телефонға ҡарата). *Полк штабында телефон шылтыраны.* Ә. Ихсан.

♦ **Ҡашығаяҡ шылтырамай тормай** (*йәки* **булмай**) *кар.* **ҡашығаяҡ.**

**ШЫЛТЫРЛАУ** *ҡ. кар.* **шылтырау.**

**ШЫЛТЫР-ШЫЛТЫР** *окш.* **1.** Ҡабат-ҡабат шылтыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шылтыр-шылтыр итеү. Шылтыр-шылтыр килеү.* ■ *Һыу алырга килгән мәлдә биҙрәләр шылтыр-шылтыр шишмә маҡтау йырын Вилгә йырлай, ти: сылтыр-сылтыр...* С. Муллабаев.

**2.** Һыу ташҡа бәрелеп аҡҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; сылтыр-сылтыр. *Тау шишмәһе шигырымды түгел, шылтыр-шылтыр көйләй үҙ йырын.* М. Кәрим.

**ШЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** Ултырған хәлдә бер урындан икенсе урынға күсеү. *Ситкә шылыу. Яҡыныраҡ шылыу.* ■ *Ул [Фәниә] миңә яҡын гына шылып ултырҙы ла бик рухланып уҡый башланы.* Ф. Иҫәнғолов. / *күсм.* Тоҡарлыҡһыҙ шыма ғына үтеү, шыуып тороу. *Суртандың ите тәмһеҙ булып сыҡты. Шулай ҙа береһененң дә тамагына ултырманы. Майлы ҡалъя һымаҡ шылып ҡына торҙо.* Р. Ғабдрахманов.

**2.** *күсм. һөйл.* Һиҙҙермәй генә ҡасыу; тайыу, ысҡыныу. *Шылыу ягын ҡарау.* ■ *[Нигмәтулла Сафуанга:] Әйҙә, быларга һиҙҙермәй генә тиҙерәк шылайыҡ! Ғәзиз башың һау ҡалыуы мөһим хәҙер.* Я. Хамматов. *[Бай] төн булгас, бар байлыҡты алып, урманга шылды, ти* (Әкиәттән).

**3.** *кар.* **шыуыу** 1. *Шылып барыу.*

**ШЫЛЫШЫУ** *ҡ.* **1.** Яткан килеш ҡул-аяҡтар ярҙамында хәрәкәт итеү; шыуышыу. *Алга шылышыу. Артҡа шылышыу.* ■ *Азамат ергә һылашып ятты ла әлморон сәнскәге битен сыйганын да тоймай, артҡа шылыша башланы.* «Ағиҙел», 1970, № 1. / Яйлап, саҡ-саҡ ҡуҙғалыу. *Паровоз .. ике яҡҡа ҡуйы пар бөркә-бөркә, яй гына алга шылышты.* Ғ. Аллаяров.

**2.** *кар.* **шыуыу** 1.

**ШЫМ** [1], **шым ғына** *р.* **1.** Тауыш-тынһыҙ, өндәшмәй тып-тын. *Шым гына тыңлау. Шым гына эшләү. Шым гына ятыу. Шым ултырыу.* ■ *[Новиков] ашаган ваҡытта һөйләшмәй, алдына ҡарап шым гына ашай.* Д. Юлтый. *Бар ҙа уйҙа, бар ҙа тып-тын, бар ҙа шым. Ҡыҫҡырып уятты Иблис барсаһын.* Ш. Бабич. **Шым булыу** өндәшмәҫ булыу, тыныу; шымыу. / Ныҡ тауышланмай, ишетелер-ишетелмәҫ кенә, әкрен генә. *Шым гына илау. Шым гына көлөү. Шым гына һөйләшеү.* ■ *Буйҙары зифа ҡамыштар шым гына йырлап тора.* Р. Ниғмәти. *Яр башында ҡыҙ һәм егет тыңлай Иҙелдең шым гына йырлауын.* Ғ. Әмири.

**2.** Тауышланмай, кешегә һиҙҙермәй, аҫтыртын ғына. *Шым гына инеү.* ■ *Һәүбән шым гына барган да ҡапыл теге ҡыҙҙың сәсенән урап тотҡан.* «Аҡбуҙат». *Ҡыланыштары ҡай саҡ артыгыраҡ та килеп сыга, бындай ваҡытта инде шым гына йылмайып ҡуялар.* Р. Солтангәрәев.

**ШЫМ** [2] *с.* **1.** Уй-ниәтен кешегә белгертмәгән, аҫтыртын. *Шым кеше. Шым булыу.*

**2.** *и. мәг. һөйл.* Йәшерен уй, сер. *Шымын сисеү.*

● *Шымда ни була? Урты тулы ком була.* Әйтем. *Шымсы шымын әйтер, һынсы сәмен әйтер.* Әйтеш.

**ШЫМА** *с.* **1.** Йөҙө, өҫтө ҡытыршы булмаған, тип-тигеҙ. *Шыма боҙ. Шыма багана. Шыма иҙән. Шыма таш. Шыма булыу. Шыма итеп һылау. // Шыма йышыу.* ■ *[Машина] бер-береһенә бер тамсы һыу кеүек окшаган, ялтырап торган шыма деталдәрҙе ҡоя.* Ғ. Ғүмәр. / Йыйырсығы булмаған; тулы, таҙа (тәнгә ҡарата). *Шыма битле.* ■ *Минең ҡуҙ күргән атта булды. Ул ҡойоп ҡуйган кеүек матур. .. Ирендәре йоҡа, арҡаһы киң һәм шыма, йылтырап тора.* Д. Юлтый.

**2.** Бөҙрәһе булмаған, тигеҙ. *Шыма сәс. Шыма йөнлө һарыҡ. Сәсте шыма итеп тарау.*

**3.** *күсм.* Логик яҡтан бәйләнешле, оҫта итеп төҙөлгән. *Шыма доклад. // Шыма яҙыу. Шыма яҙылган мәҡәлә.* **Шыма ҡәләмле** *йәки* **ҡәләме шыма** яҙыу оҫталығы булған ижад кешеһенә ҡарата әйтелә. **Шыма телле** *йәки* **теле шыма** матур итеп һөйләй белгән, телгә оҫта кешегә ҡарата әйтелә.

**4.** *күсм.* Төрлө хәйләгә оҫта; йышылған, мут. *Шыма кеше.* ■ *Хужа, дүртенсене — шарҡылдап көлә, бишенсене — ай яй үткер телле шыма малайҙыр тип, эшкә алманы.* И. Абдуллин. **Шыма ҡойроҡ** хәйләкәр. *Иллә шыма ҡойроҡ халыҡ та инде!.. Шәйхетдин абзый, тип өҙөлөп кенә торалар.* Ш. Насыров.

**5.** *күсм. р. мәг.* Бер ниндәй тоҡарлыҡһыҙ, ҡаршылыҡ кисермәй. *Эш шыма бара.* ■ *Дошман ошондай ҡараңгылыҡтан, ямгырлы төндән оҫта файҙалана. Уның сик аша шыма гына үтеп китеүе бар.* С. Кулибай. / Тотлоҡмай, еңел һәм килешле итеп. *Шыма уҡыу. Шыма һөйләү.* / Килешле, йәтеш. *Шыма баҫыу. Шыма бейеү.* ■ *Бик оҙон итеп төрлө боролмалар менән Буранбайҙы йырларга тотондом. Тауыш шыма сыҡты.* Д. Юлтый.

♦ **Шыма көпшә** *кар.* **көпшә** 1.

● *Йыландың тышы шыма булһа ла, эсе агыу.* Мәҡәл.

**ШЫМАЙТЫУ:** **ҡолаҡты шымайтыу** асыуланып йәки һағая биреп ҡолаҡты артҡа йыгыу. *Эт ҡолагын шымайта.* ■ *Аттар баштарын күтәреп, ҡолаҡтарын шымайттылар ҙа, хәүеф юҡлыгын һиҙеп, яңынан үлән һәрмәргә тотондолар.* Ш. Янбаев.

**ШЫМАЙЫУ** *ҡ.* Һөүләшмәҫ, өндәшмәҫ булыу; шым булыу. *Шымайып ултырган Мәстүрә инәй ҙә телгә килде.* Н. Мусин.

**ШЫМАҠАЙ** [1] *с. һөйл.* Мут, хәйләкәр. *Шымаҡай кеше. Шымаҡай булыу.*

**ШЫМАҠАЙ**[2] *и. диал.* Шыма көпшә (*ҡар.* **көпшә** 1).

**ШЫМАЛАУ** *ҡ. ҡар.* **шымартыу.** *Һүҙ менән шымалау. Сәсте шымалап тарау.* ■ *Боҫо боролдап торған майлы ҡурҙаҡ, һары майлы, баллы сәй янында ултырған мулланы ла Ныязғол үҙ һүҙҙәрен табып шымаланы.* Һ. Дәүләтшина.

**ШЫМАРТТЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **шымартыу.** *Йышҡы менән шымарттырыу.*

**ШЫМАРТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **шымартыу.** *Шымартылған таҡта.* ■ *Ҡойма эсендә, балта менән юнып шымартылған һымаҡ ҡара таш баға на тора.* М. Тажи.

**ШЫМАРТЫУ** *ҡ.* **1.** Шыма, тигеҙ итеү; тигеҙләү. *Йышып шымартыу. Ышҡып шымартыу. Шымартып һалыу.* ■ *Ул ваҡытта .. тирене иләп, шымартып, шуға аҙғандар, ти.* С. Агиш. / Йыйырсыҡтарҙы бөтөрөү; шыма итеү, тигеҙләү. *Битте шымартыу.*

**2.** *күсм.* Төрлө етешһеҙлектән азат итеү; сифатын яҡшыртыу. *Докладты шымартыу. Хикәйәне шымартып эшләү.* / Хатаны, етешһеҙлектәрҙе йәшереп, яҡшы итеп күрһәтеү; ялтыратыу. *Был төбәнге Яҡшымбәт бригадаһы менән бәлә бит. Бесәндәрә лә бөтөп бара. Бригадир ҡаты колаҡ шул, ҡаты колаҡ, шымартырға, күҙ буярға оҫта.* Ғ. Шәрипов.

**3.** *күсм.* Бәрәй эш-хәрәкәткә күнектереп таһыллаңдырыу, оҫта итеү. *Һөйләй-һөйләй телде шымартыу. Яҙа-яҙа ҡәләмен шымартыу.*

**4.** *күсм.* Ҡыйын хәлдән сыға белергә, ҡыйыу булырға өйрәтеү, үткерләндереү. *Донъя кешене шымарта.*

◆ **Ҡолаҡты шымартыу** *шул уҡ* **ҡолаҡты ҡайсылау** (*ҡар.* **ҡолаҡ 2**).

**ШЫМАРТЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **шымартыу** 1.

**ШЫМАРЫУ** *ҡ.* **1.** Шыма, тигеҙ хәлгә килеү, шымаға әйләнеү; тигеҙләнеү. *Иҙел .. Иҙел .. Аҙмы һыуҙар ташҡан, аҙмы таштар, йыуылып шымарған.* Ғ. Сәләм. / Йыйырсыҡтар бөтөү; тигеҙләнеү. *[Байҙың] битендәге шаҙраһы шымарып, бөтөнләй йәп-йәш егет булып килеп сыға* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Төрлө етешһеҙлек, ҡытыршылыҡтан азат булыу; сифаты яҡшырыу, һәйбәтләнеү; камиллашыу. *Доклад шымарған. Хикәйәнең теле шымарған.* ■ *Фольклор әҫәрҙәре быуындан быуынға күсә килеп үҙгәрә, шымара.* Ә. Харисов.

**3.** *күсм.* Берәй эш-хәрәкәткә өйрәнеп алыу, таһылланыу, оҫтарыу. *Офицер русса бик оҫта һөйләшә ине. Уны немец тип тә уйламаҫһың, шундай шымарып алған.* Ә. Бикчәнтәев.

**4.** *күсм.* Төрлө хәлгә дусар булып күпте күреү нәтижәһендә үткерләнеү, ҡыйыуланыу. *Шымарған кеше.* ■ *Уҡырға дәрт бик ҙур булһа ла, дарман етмәне, тик аҙыраҡ донъя күреп, шымарып ҡайттым.* Б. Ишемғол.

● *Ятҡан таш мүкләнер, йөрөгән таш шымарыр.* Мәҡәл.

**ШЫМАФЫЙ** *с.* **1.** Шым, аҫтыртын холоҡло. *Шымафый кеше. Шымафый булыу.* // *[Төлкөсура] бүтән саҡта бик шымафый ғына йөрөгән Ҡотлоғужаның йырткыска әүерелеүен, беренсе тапҡыр күрә ине.* Н. Мусин.

**2.** *и. мәг. һөйл.* Фырт кейенергә яратҡан кеше. *Бына шымафыйҙар: аяҡтарында ялтырап торған ботинка, өҫтәрендә буҫтау салбар менән гимнастёрка, билдәрендә һары ҡайыш.* Б. Бикбай.

**ШЫМБАЙ** *с. ҡар.* **шомбай.** *[Атаһы] улым үҙемә оҡшамаһын, телсәр һәм батыр булып үҫһен, исмаһам тип ҡуштырған. Ә улы иһә атаһының үҙенән дә шымбайыраҡ булып сыҡҡан.* М. Хәйҙәров.

**ШЫМБАЙЫУ** *ҡ. һөйл.* Һөйләшмәҫ-өндәшмәҫ булып, шымып ҡалыу. *Шымбайып ултырыу.* ■ *Ике килен, шымбайып, тик торалар, ҡымһайып.* З. Биишева.

**ШЫМСЫ** *и.* **1.** Аҫтыртын ғына һүҙ йыйып, һүҙ еткереп йөрөүсе. *Шымсы булып китте «дуҫмын» тигән һәр бер ҡуштаны.* Р. Сафин.

**2.** Аҫтыртын рәүештә кемде йәки ниҙелер күҙәтеп, йәшерен мәғлүмәт йыйып, тейешле дәүләт ойошмаһына еткереп йөрөгән кеше. *Полиция шымсыһы.* ■ *[Әхмәтсафа:] Аппаҡов беҙҙең араға ебәрелгән шымсы булып сыҡты.* Р. Ниғмәти.

● *Шымсы шымып әйтер, һынсы сәмен әйтер.* Әйтем. *Шымсы шына ҡағырға оҫта булыр.* Әйтем.

**ШЫМСЫЛАУ** *ҡ.* Аҫтыртын күҙәтеү алып барыу, һағалау. *[Мозой:] Һаҡ булырға кәрәк. Был Әпкәләй тигәндәре шымсылап йөрөй икән! Ни ҙә булһа бер нәмә һиҙеп маташа торғандыр.* Д. Юлтый.

**ШЫМСЫЛЫҠ** *и.* Аҫтыртын рәүештә йәшерен мәғлүмәт йыйыу эше.

**ШЫМТАҒАЙ** *с. диал.* **1.** Шыма, йышылған. *Шымтағай кеше. Шымтағай булыу.*

**2.** Үсегеп барған, үсексән.

**ШЫМТАЙ** *с. һөйл.* Өндәшмәҫ, шым. *Шымтай кеше.*

**ШЫМТАЙЫУ** *ҡ.* Күңелһеҙләнеп, өндәшмәҫ булыу; шөмтәйеү. *Шымтайып ултырыу.* ■ *[Аҡназар] ҡалған аҡсаһынан .. урын өсөн түләне лә шымтайып ҡына баҙарҙан сығып китте.* Ғ. Дәүләтшин.

**ШЫМТАЙЫШЫУ** *ҡ. урт.* **шымтайыу.** *Шымтайышып ултырыу.* ■ *Ҡайтышлай, күнәктәрҙе Кәшифә апайҙарҙың кәртә буйына ҡуйғас, шымтайышып ҡына ял итергә ултырҙыҡ.* Т. Килмөхәмәтов.

**ШЫМТЫРЫЙ: шымтырый бүрек** *диал.* меҫкен бүрек (*ҡар.* **бүрек** 1).

**ШЫМШЫҠ** *с. диал.* Быҫҡаҡ. *Шымшыҡ ямғыр.*

**ШЫМШЫҠЛАУ** *ҡ. диал.* Быҫҡаҡлау. *Ямғыр шымшыҡлап яуып тора.*

**ШЫМ-ШЫРЫҠ** *с. һөйл.* Бер тауышһыҙ, тып-тын. *Бүлмәлә бер тауыш юҡ, шым-шырыҡ.* / Шым булырға, һөйләшмәҫкә өндәгәндә әйтелә.

**ШЫМЫҒЫУ** (шымыҡ*ɤ*) *ҡ. диал.* Шытыу, моронлау (үҫемлектәргә ҡарата).

**ШЫМЫЙЫУ** *ҡ. һөйл.* Асыуланыуҙан йәки һағайыуҙан ҡолаҡты артҡа йығыу. *Ат шымайып тора, тешләп ҡуймаһын.*

**ШЫМЫҠ** *с. диал. ҡар.* **шым**[1] 1.

**ШЫМЫТЫМ** *р. диал. ҡар.* **шым**[1] 1. *Шымытым ғына сығыу.*

**ШЫМЫУ** *ҡ.* **1.** Өнһөҙ-һүҙһеҙ булыу; тыныу. *Шымып йөрөү.* ■ *Яҡынлашып килгән Юлдашты күргәс, улар шымып ҡалды.* Ю. Әхмәҙиев.

/ *күсм.* Тынғы табып, тынысланыу. *Таһира, шымып рәхәтләнеп кенә ҡалғайны, икенсе көндә үк һары сәс беҙҙе тағы ла эҙләп тапты.* Ғ. Аллаяров. *Көрәш көндәрендә һөрән һалған дәртле йәштәр, ҡайҙа шымдығыҙ.* Д. Юлтый.

**2.** Тымып ҡалыу, тыныу, баҫылыу. *Ел шымды. Дауыл шымды.* ■ *Нәфисәнең хис-тойғоларын һиҙгәндәй, тәбиғәт тә һағайҙы. Урмандағы бөтә нәмә шымды. Хатта ҡайын япраҡтары ла һелкенеүҙән туҡтаны.* Я. Хамматов.

**ШЫМЫШЫҠТАУ** *ҡ. диал.* Быҫҡаҡлау. *Ямғыр шымышыҡтап яуып тик тора.*

**ШЫМЫШЫУ** *ҡ.* Шымып тынып ҡалыу (күмәк кешегә ҡарата).

**ШЫНА** *и.* Еккә ҡағып ниҙелер яра йәки нығыта торған ялпаҡ сөй. *Ағас шына. Тимер шына. Шына ҡағыу. Шына ҡағып ярыу. Балта һабына шына ҡағыу.* ■ *Йылдар шыма, йылдар гүйә шына, ярып инә беҙҙең араға.* Ә. Әхмәткужин. *Шайтан бүрәнәнең ярығына ҡулын тыҡҡан, Алдарҙың шынаны һуғып төшөрөүе булған, шайтандың аҡырып ебәреүе булған.* «Алдар». / *һөйл.* Мүк тыҡҡыс, ҡалаҡ.

♦ **Йүкә шына ҡағыу** *ҡар.* **йүкә.** *Йүкә шына ҡаҡҡандарын белеп торам, әммә рәхәт. Маҡтау кемдең генә башын әйләндермәгән.* Р. Низамов.

**ШЫНАЛАУ** *ҡ.* **1.** Шына ҡағыу, шына һуғыу. *Шыналап ярыу.*

**2.** *күсм.* Ныҡ итеп тултырыу; тыңҡыслау. *Шыналап тултырыу.* ■ *Өй эсе йырып сыҡҡыһыҙ йылтыр-йышыр, аҫыл йыһаздар менән шыналап тултырылған.* Б. Бикбай.

**ШЫҢ**[1] *и.* Таҡмаҡҡа яҡын торған фольклор жанры; сеңˡ.

**ШЫҢ**[2] *окш.* **1.** Яңғырауыҡлы ҡалын тауышты белдергән һүҙ. *Шың итеү.* ■ *Ат тояғының дың-дың, ҡыңғырауың шың, шың* (Халыҡ йырынан).

**2.** *и. мәғ.* Зыңлап торған яңғырауыҡлы тауыш. *Тыңлай инем сулпы шыңдарын, йәш ҡыҙҙарҙың һөйөү йырҙарын.* Ғ. Хәйри.

**ШЫҢҒЫР** *окш.* **1.** Яңғырауыҡлы, көслө саф тауышты белдергән һүҙ. *Шыңғыр итеү.*

**2.** *с. мәғ.* Яңғырауыҡлы, асыҡ тауышлы. *Шыңғыр ҡурай.*

**ШЫҢҒЫРАТЫУ** *ҡ.* **1.** Шыңғыр иткән тауыш сығарыу; сыңлатыу. *[Таһир] шыңғыратып салғыһын яный.* Й. Солтанов.

**2.** Көслө, саф тауыш менән яңғыратыу. *Шыңғыратып көләү. Шыңғыратып ҡурай уйнау.* ■ *Әллә Гөлгөл йырлап ебәрерме шыңғыратып Һаҡмар буйҙарын.* Р. Ниғмәти.

**ШЫҢҒЫРАУ** *ҡ.* **1.** Шыңғыр-шыңғыр килеү, шыңғыр-шыңғыр итеү. *Салғылар шыйтылдап, шыңғырап, эшләйҙәр күмәкләп, ер тулып.* Ғ. Амантай.

**2.** Көслө, саф тауыш менән яңғырау. *Тын һауаны сиртеп тирбәлдереп шыңғырап аҡты һинең йырҙарың.* С. Кинйәкәй. *Айһай ҙа ғына тип үк бер йырлайым, киң яландар киткһен шыңғырап.* Т. Йәнәби.

♦ **Шыңғырап торған** 1) тап-таҙа, ныҡ (ҡоро һәм төҙ ағасҡа, утынға ҡарата). *Шыңғырап торған бүрәнә. Шыңғырап торған ҡарағай. Шыңғырап торған утын;* 2) иркен, буш. *Шыңғырап торған өй.* ■ *Шыңғырап торған оҙон коридор, иркен класс бүлмәләре.. үҙҙәренә саҡырғандай күренә.* Ш. Янбаев; 3) саф, асыҡ. *Шыңғырап торған тауыш.*

**ШЫҢҒЫРАУЫҠ:** **шыңғырауыҡ йылан** шыйышҡанда шыңғыр-шыңғыр иткән тауыш сығарған тропик илдәге ағыулы йылан.

**ШЫҢҒЫРАУЫҠЛЫ** *с.* Асыҡ, яңғырауыҡлы. *Шыңғырауыҡлы тауыш.* ■ *Урман араһында несҡә шыңғырауыҡлы кешнәүҙәр яңғырап китә.* З. Биишева.

**ШЫҢҒЫРЛАҠ** *и. диал.* Сыңғырлаҡ. *Еҙ шыңғырлаҡ.*

**ШЫҢҒЫРЛАТЫУ** *ҡ. ҡар.* **шыңғыратыу.** *[Юлсыларҙың] берәүҙәре буш арба, буш бричкиларын шыңғырлатып атлай-юрта кирегә үтә, берәүҙәре ауыр йөктәрен шығырлатып ҡала яғына шыуыуша.* З. Биишева.

**ШЫҢҒЫРЛАУ** *ҡ. ҡар.* **шыңғырау.**

**ШЫҢҒЫР-ШЫҢҒЫР** *окш.* Ҡабат-ҡабат шыңғыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шыңғыр-шыңғыр итеү. Шыңғыр-шыңғыр килеү.* ■ *[Ҡолондарҙың] муйындарына таҡтыҡ ҡыңғырауҙар шыңғыр-шыңғыр йырлап торһон, тип.* С. Ҡудаш. *Шыңғыр-шыңғыр итә ҡурайым, ниндәй көйҙәр генә уйнайым?* К. Кинйәбулатова.

**ШЫҢҠЫЛДАУ** *ҡ. диал.* Шыңшыу. *Эт шыңҡылдай.*

**ШЫҢҠЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **шыңҡылдау.** *Ҡаланың тышындағы мазар-зыяраттарҙа шаҡалдар шыңҡылдаштылар.* А. Таһиров.

**ШЫҢҠЫУ** *ҡ. диал.* Аяҙытып, матурланып китеү (көнгә ҡарата). *Яуындан һуң көн шыңҡып китте.*

**ШЫҢЛАУ**[1] *ҡ.* Шың[1] әйтеү.

**ШЫҢЛАУ**[2] *ҡ.* Шың[2] итеү; сыңлау. *Шыңлап китеү. Шыңлап тороу.*

**ШЫҢШЫҠ** *с. һөйл.* Мыжым, илаулап барған. *Шыңшыҡ кеше.*

**ШЫҢШЫТЫУ** *ҡ.* **1.** Илаған һымаҡ итеп сыйылдатыу (эт-бүрегә ҡарата). *Этте шыңшытыу.*

**2.** *күсм. һөйл.* Шыңшып иларға, көйһөҙләнергә сәбәп тыуҙырыу. *Баланы шыңшытыу.* / Зарландырып һөйләндереү; илаулатыу.

**ШЫҢШЫУ** *ҡ.* **1.** Илаған һымаҡ сыйылдау (эт-бүрегә ҡарата). *Таш аҫтында теге бүренең ояһы икән. Оя эсендә бүре балалары шыңшый.* С. Кулибай. *Бай .. теге этте тибеп ебәрә, эт шыңшып өрә башлай* (Әкиәттән).

**2.** Әкрен генә һуҙып-һуҙып илау, һыңҡылдау. *Шыңшып илау.* ■ *Тимер .. әсәһенең салғыйына йәбешеп, шыңшырға тотонды.* Һ. Дәүләтшина. *[Мәскәй] шыңшып ҡына килгән бер шыҡһыҙ малайға тап булды, ти* (Әкиәттән). / *күсм.* Ризаһыҙлыҡ белдереп һөйләнеү; илаулау. *[Эшселәр] икешәр-өсәр смена эшләне, әммә бер кем дә шыңшыманы.* Ә. Байрамов. *Былай шулай, уҙаман, шыңшып өйрәнмә. Уйнап-көлөп йәшә, уйнап-көлөп эшлә. Үҙеңә лә еңел булыр, кешегә лә ауырлығың төшмәҫ.* Я. Вәлиев.

♦ **Шыңшыма ямғыр** *диал.* быҫҡаҡ ямғыр. **Шыңшып яуыу** быҫҡаҡлау. *Килеп етте тиҙҙән ямғыр ҙа, ул тотондо шыңшып яуырға.* С. Кулибай.

● *Әткә һөйәк ташлаһаң шыңшымаҫ.* Мәҡәл.

**ШЫП**[1] [*рус.* шип] *и.* **1.** Мылтыҡ көбәген таҙарта торған нәҙек оҙон тимер сыбыҡ. *Шып менән таҙартыу.* / *иҫк.* Туптың, һыҙма мылтыҡтың көбәгенә йәҙрә һалып, төртөп индерә торған нәҙек оҙон таяҡ.

**2.** *диал.* Һоҫа энәһе.

♦ **Шып һымаҡ** төп-төҙ нәмәне сағыштырыу өсөн ҡулланыла. *Шып һымаҡ төп-төҙ ағас.*

**ШЫП**[2] *р.* Эш-хәрәкәттең ҡапыл, киҫә өҙөлгәнен белдерә. *Шып туктау. Шып тыныу. Шып юғалыу.* ■ *Аҫау малдарҙы короҡлап тотҡанда, Тимеркәй бер аҙым атламай шып туктата.* Д. Юлтый. *Шып баҫылды ком-дауыллы ел-буран.* Ш. Бабич.

♦ **Шып булыу** ҡапыл тыныу, шым булыу. *[Ҡыҙ Таҙға күрһәтеп:] Был малайҙы барығыҙҙан да артыҡ күрәм — тине ти. Халыҡ, башына һуккан кеүек, шып булды* (Әкиәттән). **Шып итеп** ҡапыл, көтмәгәндә. *Шып итеп килеп инеү. Шып итеп килеп туктау.* ■ *[Шәмсебанат ханым:] Яңы йыл еткәнен дә көтмәҫ, шып итеп, үҙе ҡайтып төшәр әле.* Д. Исламов.

**ШЫП**[3] *окш.* Ҡаты нәмә йомшаҡҡа һуғылғанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шып итеү. Шып итеп ҡалыу.* ■ *Ҡаскын .. иҙәнгә итеге менән шып иттереп баҫа, ләкин береһе лә уянмай* (Әкиәттән).

**ШЫП**[4] [*рус.* шип] *и. диал.* Епһә. *Иҙән шыбы. Һоҫа шыбы.*

**ШЫП-** *киҫ.* **Шы**ғ ижеге менән башланған төп сифатҡа ҡушылып артыҡлыҡ дәрәжәһе бирә. *Шып-шыма. Шып-шыйыҡ. Шып-шым.*

**ШЫПА** *р.* **1.** Бөтөнләй, тулыһынса. *Шыпа онотоу. Аҡсанан шыпа өҙөлөү. Шыпа ас ҡалыу. Шыпа бушты һөйләү. Шыпа яңғыҙ. Шыпа ят.* ■ *[Аҫылбай:] Таба алмаһам уның [байҙың] Сантарын, уға ни тип яуап бирермен, шыпа ҡатты башҡайым.* М. Тажи. *Күп тә үтмәй тинтәк Ялбыр шыпа бөлгән дә ҡуйған, ти* (Әкиәттән).

**2.** Бер ҙә, һис тә, бөтөнләй. *Шыпа күренмәй. Шыпа килгәне юҡ. Шыпа өндәшмәне.*

**ШЫПАЛАЙ** *р. диал. ҡар.* **шыпа** 1.

**ШЫПАНЛАҠ** *с. диал.* Ҡыйшанлаҡ.

**ШЫПАНЛАУ** *к. диал.* Ҡыйшанлау.

**ШЫПАН-ШЫПАН** *р.* Һиҙҙермәй, шым ғына. *[Саматтар] ҡайтып киткән булдылар ҙа, кеше аяғы һил булыу менән шыпан-шыпан ғына йәнә ат һарайына йыйылдылар.* Ғ. Шәрипов.

**ШЫПЛАНЫУ** *к.* **1.** Тығыҙ булып урынлашыу, теҙелеү һ. б. ҡарата. *Ҡарарға килеүселәрҙең урынһыҙ ҡалғандары .. койма тирәһенә шыпланып баҫҡан.* Т. Килмөхәмәтов.

**2.** *төш. ҡар.* **шыплау.**

**ШЫПЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **шыплау.** *Шыплатып ҡуйыу.*

**ШЫПЛАУ** *к.* Тәртип менән тығыҙлап урынлаштырыу, кәплэп ҡуйыу. *Шыплап тейәү. Шыплап өйөү. Шыплап һалыу.* ■ *Оҙон кәштәләргә аршынлы тауар төргәктәре шыплап тултырылған.* Ғ. Ғүмәр. *Ҡатын-ҡыҙҙар урылған игенде ташый, оҙон эҫкерттәргә шыплап өйә.* Й. Солтанов.

**ШЫПТАҒАЙ** *с.* Ботаҡһыҙ нәҙек оҙон, төп-төҙ. *Шыптағай ағас. Шыптағай булып үҫеү.* ■ *Гел бер төрлө шыптағай һылыу ҡарағайҙан ғына торған урмандар күңелде кәнәғәтләндерә алмай.* С. Ҡудаш.

**ШЫПТАҒАЙЛАНЫУ** *к.* Шыптағайға әйләнеү, шыптағай булыу. *Ағастар энә төрткөһөҙ булып сыҡҡан да, шыптағайланып, күккә күтәрелгән.* Т. Килмөхәмәтов.

**ШЫПТАУ** *к. диал.* Моронлау, шытыу (үҫемлеккә ҡарата).

**ШЫПТЫР** *окш.* Ҡоро үлән, япраҡ кеүек нәмә ҡыштырҙағанда, һыу кискәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шыптыр итеү. Шыптыр итеп ҡалыу. Шыптыр итеп ҡойолоп китеү.*

**ШЫПТЫРЛАТЫУ** *к.* Шыптыр-шыптыр иттереү, шыптыр-шыптыр килтереү; шыптыр-шыптыр иткән тауыш сығарыу. *Шыптырлатып һыу кисеү. Шыптырлатып ямғыр яуыу.* ■ *Ел иҫеп, өй түбәһендәге серек һаламдарҙы шыптырлата.* Б. Бикбай.

**ШЫПТЫРЛАУ** *к.* Шыптыр-шыптыр итеү, шыптыр-шыптыр килеү. *Шыптырлап һыу аға. Аяҡ аҫтында ҡоро үлән шыптырлай.* ■ *Безләп осҡан бал ҡортоноң һәр береһе уға [Буранбайға] сәләм бирә, ҡолаҡ төбөндә шыптырлаған һәр япраҡ сер һөйләй.* Т. Килмөхәмәтов.

**ШЫПТЫРЛАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **шыптырлау.** *Елгә ҡайын япраҡтары шыптырлаша.* ■ *Шыптырлашып әкиәт һөйләй төҫлө һыу буйында оҙон ҡамыштар.* Я. Ҡолмой.

**ШЫПТЫРТ** *окш.* Бер генә шыптыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *[Һаксы] ҡуйы әрем араһынан шыптырт иткән тауышҡа юлдың уң яғына боролдо.* Һ. Дәүләтшина.

**ШЫПТЫР-ШЫПТЫР, шыптыр ҙа шыптыр** *окш.* Ҡабат-ҡабат шыптыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шыптыр-шыптыр итеү. Шыптыр-шыптыр килеү.* ■ *Ел иҫкәндә, башҡа ағастар кеүек, ул да [тирәк] шыптыр-шыптыр килеп шауланы.* Р. Солтангәрәев. *Шыптыр-шыптыр ямғыр яуа өй башы ҡалайҙарға* (Халыҡ йырынан).

**ШЫПТЫРЫУ** *к. ҡар.* **сыптырыу.** *Шыйыҡ тал менән шыптырыу.*

**ШЫПҺЫҘ** *р. диал.* Килешһеҙ, яйһыҙ итеп. *Шыпһыҙ тотоноу.* ■ *[Зинурә Азаматовка:] Йомағужа бабай мәрхүм әйтмешләй, һеҙ һыбай йөрөргә һаман өйрәнмәгәнһегеҙ икән әле. Мин дә тәүҙәрәк шулай шыпһыҙ йөрөй инем.* Ә. Вәли.

**ШЫП-ШЫП, шып та шып** *окш.* Ҡабат-ҡабат шып иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шып-шып итеү. Шып та шып килеү.* ■ *Рахмайҙың итеге текелдәй, ә өс малай сарыҡ [кейгән], улар шып та шып йөрөй.* К. Кинйәбулатова.

**ШЫПЫЛДАТЫУ** *к.* **1.** Шып-шып иттереү; шып-шып килтереү. *Шыпылдатып баҫыу.*

**2.** *күсм.* Нимәнелер бер-бер артлы күп итеп булдырғанда, ғәмәлгә ашырғанда әйтелә. *Балалар балыҡты шыпылдата ғына.* ■ *Минең алға дүрт ҡуян килеп сыҡҡан ине әле! Бөтәһен дә шыпылдатып, ергә һалған булыр инем.* Ф. Әсәнов.

**ШЫПЫЛДАУ** *к.* **1.** Шып итеү, шып-шып итеү. *Шыпылдап тороу.*

**2.** *күсм.* Нимәләр күп булып бер-бер артлы алға килеп торғанда, тотҡарлыҡһыҙ ғәмәлгә ашҡанда әйтелә.

**ШЫПЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **шыпылдау.** *Пүләләр башняларға бәрелеп, бүрәнәгә борсаҡ һипкәндәй, шыпылдашып торалар.* Ә. Байрамов.

**ШЫПЫМ** *и. диал.* Ҡымыҙ бешә торған көбө.

**ШЫПЫН** *р. һөйл.* Һиҙҙермәй, шым ғына. *Шыпын ғына сығып китеү. Шыпын-шыпын ғына һөйләшеү.* ■ *Туҡта, шыпын ғына баҫҡан аяҡ тауышы ишетелә. Кем булыр икән был?* Ә. Вәли.

**ШЫПЫРТ, шыпырт ҡына** *р.* Һиҙҙермәй, шым ғына. *Шыпырт сығып тайыу. Шыпырт-шыпырт ҡына һөйләшеү.* ■ *Шыпырт ҡына баксаға табан барабыҙ. Йөрәк дөп-дөп һуға.* Т. Йәнәби. *Урмансың да хатта һиҙмәй кала беҙҙең шыпырт урман киҫкәнде.* Ғ. Дәүләтов.

**ШЫПЫРТМАҠ**[1] *и. диал.* Боғал.

**ШЫПЫРТМАҠ**[2] *с. диал.* Билһеҙ, тотош (күлдәккә ҡарата). *Шыпыртмаҡ күлдәк.*

**ШЫПЫРТЫН** *р. һөйл.* Тауышланмайса, әкрен генә, шым ғына. *Шыпыртын сығып китеү.*

**ШЫР**[1] *с.* **1.** Үтә алмаҫлыҡ ҡуйы. *Өсөнсө көн инде шыр урманда юл таба алмай йөрөп интектем.* Б. Вәлит. *Ҡыҙыл һыуҡай буйы ай шыр уҫаҡ* (Халыҡ йырынан).

**2.** *и. мәғ.* Бик ҡуйы ағаслыҡ; шырлыҡ. *Шырға инеп ҡасыу.* ■ *Ҡороған йылға үҙәнен шыр ҡаплай.* Н. Мусин. *Шырҙа ҡуян типтем, тип ҡара бөркөт маҡтаныр, һунарҙа һис яҙлыҡмаҫ.* М. Буранғолов.

**ШЫР**[2] *с.* **1.** Тотош бер нәмәнән торған; шау. *Шыр һөйәк. Шыр һыу.* ■ *Ниңә улайтып шыр таш араһына барып инергә инде.* Ҡ. Ибәтуллин.

**2.** *киҫ. мәғ.* Сифат алдынан килеп, уның мәғәнәһен көсәйтә. *Шыр алйот. Шыр ялангас. Шыр наҙан. Шыр тоҙ.* ■ *Әллә һаташтыңмы? .. Бына иҫәр, бына шыр тиле.* Д. Юлтый.

**3.** *р. мәғ.* Бөтөнләй, тотош, тулыһынса. *Шыр ялангасланыу.* ■ *Яҙмаған ул бер ниндәй ғариза, шыр таҙа был хаҡта Нурулла.* С. Ҡудаш.

**ШЫР**[3] *с.* Бер нәмәһеҙ, тотош буш. *Шыр дала. Шыр ялан.* ■ *Өй, йорт шып-шыр булып ҡалды.* Ғ. Ғүмәр.

**ШЫР**[4] *и. иҫк.* Сәй тултырылған ике ботлоҡ ҡап. *Бер шыр сәй.*

**ШЫР**[5]: **шыр ебәреү** *шул уҡ* **шөр ебәреү** (*ҡар.* **шөр**).

**ШЫРАЙЫУ** *к.* Буп-буш булып ҡалыу; ялан-ғасланыу. *Күршеләрен аслыҡ ялмап киткәс, әйләнәһе ҡалған шырайып — бер өй тора ауыл дың ситендә ҡараҫкы шикелле һерәйеп.* С. Ҡудаш.

**ШЫРАН** *с. диал. ҡар.* **шырантай 1.**

**ШЫРАНТАЙ** *с.* **1.** Ит ҡунмаған оҙон тороҡло (малға ҡарата).

**2.** *ҡар.* **һуйҙан.**

**ШЫРАУ**[1] *и.* **1.** Ҡоро ағас, үләндең буйға ярсылып сыҡҡан йоҡа, осло сарпыһы. / Тәнгә ҡаҙалған шул ярсыҡ; суп. *Шырау инеү.* ■ *Тимерҙең аяҡтарына шырау ҡаҙалып бөттө.* Б. Бикбай.

**2.** *с. мәғ. күсм.* Ярылып ҡатҡан. *Шырау ҡул.* ● *Шыраулы ағас ҡулға хас.* Әйтем.

**ШЫРАУ**[2] *с.* **1.** Шырт, ҡаты. *Шырау сәс. Шырау һаҡал.* ■ *Ул [Ризуанов] уң ҡулының усы менән үҙенең тырпайып торған ҡыҫҡа шырау сәстәрен һыйпап ала ла тыныс ҡына һөйләшә.* Ә. Вәли.

**2.** Ярылып ҡытыршыланып бөткән; ҡаты. *Шырау ҡул.* ■ *Бына, тигән Мулдаҡай, шырау устарын бер-береһенә ыуып,— беҙ ҙә атлы булдыҡ.* Б. Бикбай.

**ШЫРАУЛАНЫУ** *к.* Ярылып, ҡытыршыланып бөтөү (аяҡ-ҡулға ҡарата). *Садрислам, үҙен иҫләгәне бирле .. утау утаны, көлтә бәйләне. Малайҙың устары шырауланып ҡата, ҡамыл һыҙырыуҙан балтырҙарының ҡутырламаған ере ҡалмай.* Ф. Иҫәнғолов.

**ШЫРҒЫЯ** *с. диал.* Ҡыйпысыҡ. *Шырғыя ҡыҙыҡай.*

**ШЫРҘАЙЫУ** *к. диал.* Һонтайыу. *Шырҙайып үҫеп китеү.*

**ШЫРҠ** *окш.* Ҡапыл ғына көлгән өҙөк тауышты белдергән һүҙ. *Шырҡ итеп көлөү.*

**ШЫРҠАНЛАҠ** *с.* Юҡ-барға ҡыҫҡырып көлөргә ятраҡан. *Шырҡанлаҡ булыу.*

**ШЫРҠАНЛАУ** *к.* Юҡ-барға ҡыҫҡырып көлөү, ҡылансыҡланыу. *Гөлмәҙинә шырҡанлай башлағас, Хәжиәхмәттең асыуы ҡабарҙы.* Я. Хамматов.

**ШЫРҠ-ШЫРҠ, шырҡ та шырҡ** *окш.* Ҡабат-ҡабат шырҡ иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шырҡ-шырҡ килеү. Шырҡ та шырҡ көлөү.* ■ *Улар [Орҡоя менән Тәнзилә] шыбыр-шыбыр килләр ҙә шырҡ-шырҡ көлөп алалар.* Ф. Иҫәнғолов.

**ШЫРҠЫЛДАУ** *к.* Ҡыҫҡырмай, тыйыла бире-берәк көлөү; шырҡ-шырҡ итеү, шырҡ-шырҡ килеү. *Шырҡылдап көлөү.* ■ *Кәбир кемдеңдер көлөүен ишетте. Артына әйләнһә, башын артҡа ташлап, Шәрги шырҡылдай имеш.* Я. Вәлиев.

**ШЫРҠЫЛДАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **шырҡылдау.** *Шырҡылдашып көлөү.*

**ШЫРҠЫН** *с. диал.* Ҡылансыҡ. *Шырҡын ҡыҙыҡай.*

**ШЫРЛАУ** *к.* **1.** Тауышланып, шаулап ағыу. *Шырлап ағыу.* ■ *Окшаһа һиңә матур яҙ, һыуҙарҙың шырлауҙары; талдарға ҡунған ҡоштарҙың сутылдап йырлауҙары.* Р. Ниғмәти.

**2.** Күп булып ағыу; сорлау. *Ҡайнар ҡаным бар тән буйы шырлап аға.* Ғ. Амантай.

**ШЫРЛЫҠ** *и.* Үтеп сыҡҡыһыҙ ҡуйы ағаслыҡ. *Шырлыҡ араһы. Шырлыҡҡа инеү. Шырлыҡты ярып сығыу.* ■ *Шырлыҡ, әрәмә эстәрендә талға баҫып һайраған төрлө турғай тауыштары Шәрәйҙе татлы йоконан уятты.* Т. Йәнәби. / Нимәнеңдер ҡуйы булып үҫкән урыны. *Ерек шырлығы. Уҫаҡ шырлығы.* ■ *Нурулла кесерткән, дегәнәк шырлығының ысығын ҡулындағы биҙрәһе менән һирпелдерә-һирпелдерә .. шишмәгә йүгереп төшөп китте.* Ш. Янбаев.

**ШЫРМЫЙ** *с.* Уйынсалап, ҡыялатып һөйләргә ятраҡан йор һүҙле, шуҡ. *Мөхәмәтулла бабайҙы еткереп һөйләгәне, һамаҡлап та ебәргәне өсөн «шырмый» тиҙәр ине.* Ә. Вахитов.

**ШЫРМЫЙЛАНЫУ** *к.* Шырмый булыу. *Әхмәтша сәй эскәндә шырмыйланып, йор һүҙҙәр һөйләп ултырҙы.* Ж. Кейекбаев.

**ШЫРПЫ**[1] *и.* Ут тоҡандыра торған көкөрт башлы ағас таяҡса; сыйғыс. *Шырпы башы. Шырпы ҡабы. Шырпы фабрикаһы.* // *Шырпы һыҙыу.* ■ *Шырпы өсөн һәр төрлө ағас ярамай. Уға шыма,*

*ботакһыҙ, таҙа уҫак, ҡайын талап ителә.* Ә. Ихсан.

♦ **Шырпы төртөү** ут төртөү.

**ШЫРПЫ**[2] *и.* **1.** (*йәки* **ҡырҡ шырпы**) Көрөҫ артындағы буйлыҡты төрлө биҙәк төшөрөү өсөн айырып торған таяҡсалар: шәбе. **Шырпы ҡайтарыу** (*йәки* түгеү) сүплэп, шырпылар менән айырып ҡуйған биҙәкте ҡабатлап һуғыу.

**2.** *диал. кар.* **шырау**[1] 1.

**ШЫРПЫҠАЙ** *с. диал.* Ҡупшыҡай.

**ШЫРТ**[1] *и.* **1.** Ҡайһы бер хайуандарҙың йыуан, ҡаты йөнө. *Суҫҡа шырты.* / Елкәләге йәки сикәләге ҡаты ҡыҫҡа төк. *Мин уның [атайымдың] әйткән бер һүҙен тыңлап ҡына торор инем, шырт баҫҡан сикәһенә яңағымды ышҡыр инем.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *с. мәг.* Ҡаты булып, тырпайып торған. *Шырт йөн. Шырт сәс.* ■ *Ҡарҙар ирер ағып бөттө. Ер өҫтө .. шырт үлән менән ҡапланды.* Ғ. Ибраһимов. *Йәрмөхәмәтов танымаҫлыҡ булып үҙгәргән, һурылған яңаҡтарын терпеләй шырт ҡара һаҡал баҫҡан.* Ф. Иҫәнғолов.

♦ **Шырт балыҡ** *диал.* этеш.

**ШЫРТ**[2] *и.* Төрәндең алдынан ҡырҡып бара торған бысаҡ; алтөрән. *[Йәноҙаҡ:] — Анау көндө .. теге һырға убаһы янында бер һабан күреп ҡалдым. Ҡараһам — беҙҙең һабан шырты, төрәне — бөтәһе лә үҙ эшем.* Р. Ниғмәти.

**ШЫРТ**[3] *и.* Етен, киндер сүсен иләү хәленә еткергәнсә таҙарта, йомшарта торған тимер тешле яҫы тараҡ. *Шырт аша үткәреү. Шырт менән таҙартыу.*

**ШЫРТ**[4] *оҡш.* Мурт нәмә һынғанда сыҡҡан ҡаты өҙөк тауышты белдергән һүҙ. *Шырт итеү. Шырт итеп ҡалыу.* ■ *Бер ауыл мәктәбендә ватылды тәҙрә шырт итеп. Шырт ҡына түгел шул, ул бит ҡыйрай сылтырт итеп.* Ш. Бабич.

**ШЫРТЛАҠА** *и. диал.* Этеш.

**ШЫРТЛАМА** *и. диал.* Сыртлаҡ. *Шыртлама тағыу. Шыртлама менән ҡаптырыу.*

**ШЫРТЛАНЫУ** *ҡ.* Шыртҡа әйләнеү, шырт булыу. *Сафуан .. көҙгөгә барып шыртланып сыға башлаған һаҡал-мыйығын һыйпаны.* С. Агиш. / Шырт һымаҡ ҡаты булыу. *Буранбайҙың ай буйына ҡала һыуында йыуыныр, шыртланып киткән сәсе ҡарайып, май һөрткән һымаҡ йылтырап, маңлайына төштө.* Т. Килмөхәмәтов.

**ШЫРТЛАУ** *ҡ.* **1.** Шырт итеү. *Шыртлап һыныу.*

**2.** *күсм.* Ҡурҡыу, шөрләү. *Мәсәғүтовтың үҙенән элек «уҫал» .. тигән даны килгән ауылға .. Халыҡ, дөрөҫөн әйткәндә, унан шыртлай.* Р. Солтангәрәев. *Йәмилә төндә ҡараусыл өйөнә яңғыҙы инергә шыртлаңҡырай, әммә нимәнән шикләнә, үҙе лә белмәй.* З. Ураҡсин.

**ШЫРТ-ШЫРТ, шырт та шырт** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат шырт иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шырт-шырт килеү.* ■ *Ат шырт-шырт иттереп бесән ашай, тирә-яҡтағы ағастар араһында төрлө ҡоштар сырҡылдашып һайрай ине.* М. Ғафури.

**ШЫРТЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Шырт-шырт иттереү. *Шыртылдатып көйшәү.* ■ *Таңдыса балтырғандың япрағын, сығып ҡына килгән көпшәһен шыртылдата сәйнәп, тамаҡ ялғап ала.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1972, № 7.

**ШЫРШАУ** [*рус.* шершавый] *с. диал.* Ҡытыршы. *Шыршау игәү.*

**ШЫРШЫ** *и.* **1.** Сатыры конус формаһында булған ҡыҫҡа, ҡаты ылыҫлы, мәңге йәшел ағас. *Шыршы энәһе. Шыршы олоно.* ■ *Шыршы матур, шыршы матур, шыршы һәр саҡ йәм-йәшел. Энәләрен ҡоймай бер ҙә, һәр ваҡытта йәп-йәш ул.* Ҡ. Даян. **Аҡ шыршы** оҙон яҫы энәле, эре оҙон тубырсыҡлы ылыҫлы ағас; шыж. **Күк шыршы** күкшел төҫтәге ҡуйы ылыҫлы шыршы.

**2.** Яңы йыл байрамының билдәһе рәүешендә биҙәп ҡуйылған ылыҫлы ағас. *Шыршы биҙәү.* ■ *Бейек шыршы тора уртала: бер ботаҡта ҡояш балҡып яна, бер ботаҡта йондоҙ нурлана, .. оса ракеталар, .. аттар сабалар,.. ҡыуышалар бала-сағалар.* М. Кәрим. **Шыршы турғайы** *кар.* **турғай. Шыршы үләне** *диал.* ҡырҡбыуын.

**ШЫРШЫЛЫҠ** *и.* Шыршы урманы, шыршы үҫкән ағаслыҡ.

**ШЫР-ШЫР** *оҡш.* Танау тартҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шыр-шыр итеү.*

**ШЫРЫ** *и.* Һыуыт-һаба яһау өсөн махсус рәүештә эшләнгән йылҡы тиреһе. // *Шыры күн.*

**ШЫРЫМ**[1] *и. диал.* Иген ҡыйы.

**ШЫРЫМ**[2] *и. диал.* Ваҡ күҙле быҫҡаҡ ямғыр. *Шырым ямғыр.*

**ШЫРЫШ** *и. кар.* **сырыш.** *Битен шырыш ҡаплаған. // Шырыш ҡул.*

**ШЫРЫШЛЫ** *с. кар.* **сырыш.** *Шырышлы муйын.* ■ *Уй балағынам! Ҡайһы ғына ерҙәрҙә ятып ҡалды икән .. Буҫыҡҡан тауышы менән һыҡранды ул эсә, шырышлы биттәренә күҙ йәштәре тәгәрәне.* Ж. Кейекбеев.

**ШЫРЫШЫУ** *ҡ. кар.* **сырышыу.** *Бите шырышҡан. Шырышҡан күлдәк.* ■ *Дивандың чехолы шырышып, бөгәрләнеп бөткән.* З. Биишева.

**ШЫТҠЫ** *и. кар.* **шытым** 1. *Көнбағыш шытҡыһы. Шытҡы сығыу.*

**ШЫТТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Шытырға шарт, мөмкинлек биреү. *Орлоҡ шыттырыу. Ҡабаҡ орлоғон шыттырып ултырталар.*

**2.** *күсм.* Булмағанды үҙенән өҫтәп, арттырып һөйләү. *Шыттырып һөйләү.* ■ *Хәмиттең бер аҙ арттырып ебәрә торған, беҙҙең яҡса әйткәндә, шыттыра торған ҡылығы ла юҡ түгел.* Ә. Вәли.

**ШЫТЫЙ** *с. диал.* Бәләкәй кәүҙәле (малға ҡарата).

**ШЫТЫҠ** *и. диал.* **1.** Морон төрткән, шытҡан орлоҡ. / Шытҡан картуф күҙе.

**2.** *күсм.* Маҡтансыҡ, буш ҡыуыҡ.

**ШЫТЫЛЫУ** *ҡ.* Йөйө тартылып, ептәренән һүрелеп сығыу, бүҫелеү. *Шытылып сығыу. Ең төбө шытылған.*

**ШЫТЫМ** *и.* **1.** Орлоҡтан морон төртөп сыҡҡан үҫенте. *Йәшел шытым. Шытым сығыу.* ■ *Ҡамыл төптәрен кейеҙҙәй ҡуйы йәшел шытымдар ҡаплаған.* Я. Вәлиев.

**2.** Орлоҡтоң шытыу һәләте; сығыш. *Лаборатория шарттарындағы орлоҡ шытымы тәбиғәт шарттарындағы шытымға ҡарағанда байтаҡ юғары.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 2 ноябрь.

**ШЫТЫМЛЫ** *с.* Шытып сығыу һәләте юғары булған; сығышлы. *Юғары шытымлы орлоҡ. Түбән шытымлы орлоҡ.*

**ШЫТЫР**[1] *окш.* Өҙөк-өҙөк һаңғырау тауышты белдергән һүҙ. *Шытыр итеү. Шытыр итеп калыу.*

**ШЫТЫР**[2] *с.* Тырпайып торған, ҡаты; шырт. *Шытыр сәс. Шытыр мыйыҡ.*

**ШЫТЫРЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** Шытыр-шытыр иттереү. *Шытырлатып йыртыу.*

**2.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында бик шәп, бер ниндәй тотҡарлыҡһыҙ тигән мәғәнәне аңлата. *[Белеш:] Яҙһаҡ ни, шытырлатып яҙабыҙ ҙа ташлайбыҙ уны.* Б. Бикбай. *[Ташбулат:] Бөтә кеше грамотный булып бара. Ибрай карттың ҡыҙҙарына тиклем шытырлатып газета уҡый.* С. Агиш.

**ШЫТЫРЛАУ** *ҡ.* Шытыр-шытыр итеү, шытыр-шытыр килеү. *Шытырлаған тауыш. Шытырлап һыныу.* ■ *Яҡын ғына ерҙә ағас араһында ҡоро-һарылар шытырлай. Төндә ҡуяндар йөрөй, күп ваҡыт ҡыр кәзәләре килеп сыға.* Д. Юлтый. *Ҡоро бесән кәрәсин һипкәндәй шытырлап яна башланы.* Ж. Кейекбаев.

**ШЫТЫРТ** *окш.* Бер генә тапҡыр шытыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шытырт итеү.* ■ *Аттың ҡуҙғалыуы булды, арҡы тәгәрмәс шытырт итте.* С. Агиш.

**ШЫТЫР-ШЫТЫР** *окш.* Ҡабат-ҡабат шытыр иткән тауышты белдергән һүҙ. *Шытыр-шытыр итеү. Шытыр-шытыр килеү.* ■ *Аҡса һанайҙар, шытыр-шытыр сытса йыртalар.* С. Агиш.

**ШЫТЫРЫШ** *с. диал.* Боролоп үҫкән, борош. *Шытырыш ағас.*

**ШЫТЫУ** *ҡ.* **1.** Морон төртөп орлоҡ яралғыһы сығыу; үҫенте биреү. *Шытҡан орлоҡ. Шытҡан иген. Шытҡан картуф. Шытып сығыу.* ■ *Хисам тарыһының шытып сығыуына, кем уҙарҙан үҫеп китеүенә ҡыуанып бөтә алмаған* (Әкиәттән). / *күсм.* Барлыҡҡа килеү. *Һинең өсөн, һинең иркең өсөн, ерҙә барған күпме ҡан ҡойош. Ошо быуындарҙың шул ҡанынан шытып сыҡты беҙҙең был тормош.* Ш. Бикҡол.

**2.** *күсм.* Маҡтаныу, кәпәренеү. *Суптәй эш эшләһә лә, эй шыта Борсаҡбикә.* А. Игебаев.

**ШЫУ**[1] *окш.* Етеҙ хәрәкәт, көслө ел тауышын белдергән һүҙ; жыу. *Аҡъял менән Тау батыр Ҡара урман эсенән барғанда шыу иткән, шатыр-шотор килгән тауыш ишетеп ҡалды, ти* (Әкиәттән).

♦ **Йөрәк шыу итеү** ҡапыл ныҡ ҡурҡыу. *Сәгиҙәнең йөрәге шыу итеп китте, биттәре янды, маңлайына тир бәреп сыҡты.* М. Тажи.

**ШЫУ**[2] *р. диал. кар.* **шау**[2]. *Шыу тоҙ.* ■ *Таштуғайҡай буйы эй шыу ҡамыш һыҙылып ҡына сыға бер тауыш* (Халыҡ йырынан).

♦ **Шыу юрға** ойотоп ҡына юрғалай торған ат.

**ШЫУАЙЛАУ** *ҡ. һөйл.* Ҡурҡыу, шөрләү.

**ШЫУҒАЛАҠ** *с.* Шыуып торған, шыма; шыйғалаҡ. *Шыуғалаҡ юл.* ■ *Аяҡ аҫтына шыуғалаҡ япраҡтар түшәлгән. Келәмдә йөрөгән һымаҡ йомшаҡ.* Н. Мусин. *Бүре мискәләге һыуға сумған .. Мискә бик тәрән, сите йәбешеп сыҡҡыһыҙ шыуғалаҡ булған* (Әкиәттән).

**ШЫУҒЫР** *с.* Шәп шыуа торған. *Яһай Ғариф ҡустыһына йылғыр һәм шыуғыр сана.* Р. Назаров.

**ШЫУҘЫРЛАУ** *ҡ. кар.* **шауҙырлау.** *Эре орлоҡло алтын башаҡтар ҡыштырлап шыуҙырлайҙар.* Ш. Шәһәр.

**ШЫУҘЫРЛАШЫУ** *ҡ. кар.* **шауҙырлашыу.** *Илем минең, һинең ышанысты аҡламаһа улым — мең ҡайғы .. Алтындарың ятһын шыуҙырлашып, ул саҡта мин ярлы, бик ярлы!* К. Кинйәбулатова.

**ШЫУҘЫРМА** *и.* **1.** Ишектең, ҡапҡаның шыуҙырып йөрөтмәле бигеге; типке. *Ишек шыуҙырмаһы.*

**2.** Шыуҙырып асмалы төнлөк. *Шыуҙырманы асыу.*

**3.** *диал. кар.* **ирте.**

**ШЫУҘЫРМАЛЫ** *с.* **1.** Шыуҙырма ҡуйылған, шыуҙырма биге булған. *Шыуҙырмалы ишек. Шыуҙырмалы ҡапҡа.*

**2.** Шыуып йөрөмәле итек яһалған. *Шыуҙырмалы тәҙрә.*

**ШЫУҘЫРТЫУ** *ҡ. йөкм. кар.* **шыуҙырыу.**

**ШЫУҘЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. кар.* **шыуҙырыу.**

**ШЫУҘЫРЫУ** *ҡ.* Нәмәне күтәрмәй этеп йәки тартып урынынан күсереү. *Ситкә шыуҙырыу. Өҫтәлде шыуҙырыу. Шыуҙырып ултыртыу.* ■ *Әхмәҙулла турпышаны алып ташланы ла һандыҡты урынынан шыуҙырмаҡсы булды.* Ә. Вахитов. / Шыма, тигеҙ нәмә өҫтөнән тәгәрәтеп йәки һөйрәп хәрәкәт иттереү; йөрөтөү. *Шыуҙырып алып барыу.* ■ *Булат саңғыны аяғына элҡтереп иҙәндә шыуҙырып ҡараны.* М. Тажи. / Аяҡты күтәрмәй генә хәрәкәт иттереү. *Аяҡты шыуҙырып ҡына атлау. Шыуҙырып ҡына баҫыу.* ■ *Бала аяғын алмаш-тилмәш саҡ ҡына шыуҙырҙы ла лап итеп йығылып барып төштө.* М. Тажи.

**ШЫУҘЫРЫШЫУ** *ҡ. урт. ярҙамл. кар.* **шыуҙырыу.** *Өҫтәл шыуҙырышыу.*

**ШЫУМА** *с.* Шыуып тормалы; шыуҙырмалы. *Беҙ вагондың шыума ишектәрен шар асып ебәрҙек.* С. Кулибай.

**ШЫУЫТЫУ** *ҡ. кар.* **шыуҙырыу.**

**ШЫУЫУ** *ҡ.* **1.** Шыма, тайғаҡ булыу сәбәпле тотолоп тормау, тотҡарлыҡһыҙ хәрәкәт итеү. *Шыуып тороу. Шыуып сығыу. Баҫҡыс боҙланған, шыуа.* / Хәрәкәт итеү, барыу (сана, саңғы кеүек нәмәләргә ҡарата). *Саңғы шыуа.* ■ *Их, рәхәт шыуа санам.* Ш. Бабич.

**2.** Сана, саңғы кеүек нәмә менән тауҙан төшөү. *Саңғыла шыуыу. Санала шыуыу.* ■ *Малай саңғыһына ултырған да, тау түбәненә шыуып төшөп киткән.* Н. Мусин. / Ултырған көйө аҫҡа хәрәкәт итеү. *Рәхимә повозканан көскә шыуып төштө.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Кәүҙәне һөйрәтеп хәрәкәт итеү (һөйрәлеүселәргә ҡарата). *Йылан шыуа.* / Яткан килеш ҡул-аяҡтар ярҙамында хәрәкәт итеү; шылышыу. *Түш менән шыуыу. Шыуып барыу.* ■ *Тауыш-тынһыҙ ғына йылға ярына шыуып төштөм.* С. Кулибай. *Окоптарҙан сыҡҡандан һуң шыуып йөрөнөк түш менән* (Бэйеттән).

**4.** Үҙенән-үҙе хәрәкәткә килеп урындан күсеү. *Аҫҡа шыуышыу. Ситкә шыуышыу. Ҡолаҡбау тәртә осона шыуған.* ■ *Мәгфүрә башынан шыуып, сиселеп барған .. яулығын төҙәтеп бәйләне.* Һ. Дәүләтшина. / Ултырған хәлдә ҡалҡына биреп, урындан урынға күсеү; шылыу. *Көтөп тороусылар .. ишек янынараҡ шыуып ултырҙы.* С. Агиш.

**5.** *күсм.* Бер ыңғай менән яй ғына хәрәкәт итеү; күсеү. *Оло ҡара болот һымаҡ, ер ябып, бер нисә мең баш ҡуй көтөүе шыуҙы.* Һ. Дәүләтшина. *Томан шыуа туғай арҡыры.* Ғ. Ибраһимов.

**6.** *күсм.* Тауышһыҙ-тынһыҙ ғына ҡулдан китеү; олағыу. *Миңъян килгән. Тағы ла: «Сәй-шәкәрлек...» Алмашына шыуған баса тун.* Ғ. Сәләм.

♦ **Ултырып шыуғаны** бар халыҡты иҫәпкә алғанда, күберәк бала-сағаны, йәштәрҙе дөйөмләштереү өсөн ҡулланыла. *Бөтә ауыл йыйылды. Аяҡтан баҫҡан, ултырып шыуғандың бөтәһе лә был гәжәп ваҡиғанан ситтә тороп ҡалырға теләмәне.* З. Биишева.

**ШЫУЫШМА** *и.* Шыуып төшкән ҡар йәки ер ишелмәһе; күскен. *[Хәлит:] Беҙҙең разрезда ер ишелеү, йәғни фәнни тел менән әйткәндә, шыуышмалар теңкәгә тейгәйне.* Ғ. Рамазанов.

**ШЫУЫШТЫРЫУ** *ҡ.* Кәүҙәне ҡалҡытмай хәрәкәт иттереү.

**ШЫУЫШЫУ** *ҡ.* **1.** Шыуып хәрәкәт итеү. *Йылан шыуыша.* / Ятҡан килеш аяҡ-ҡул ярҙамында хәрәкәт итеү; шылышыу. *Түш менән шыуышыу.* ■ *Беҙ ергә ятып, шыуышып алға барабыҙ.* Д. Юлтый.

**2.** Ултырған хәлдә ҡалҡына биреп, урындан урынға күсеү. *Ҡыҙҙар унан [Сәғиҙәнән] ситкәрәк шыуышып, .. пырхылдап көлөп ҡуйҙы.* М. Тажи.

**3.** *күсм.* Бер ыңғай менән яй ғына күсә барыу. *Күктә һүнә һуңғы йондоҙҙар, шыуыша томан тауҙың үренә.* Р. Зәйни. / *күсм.* Яй ғына уҙыу; үтеү. *Бөгөн ваҡыт шыуышып ҡына атлай.* Р. Бикбаев.

**ШЫШ-БЫШ, шыш та быш** *оҡш.* **1.** Ҡыҙған нәмәгә һыу сәсрәгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Шыш-быш килеү. Шыш-быш итеү.* ■ *Шыш та быш килеп паровоз үтеп китте.* З. Ураҡсин.

**2.** Шыбырлап һөйләшкән тауышты белдергән һүҙ. *Шыш-быш һөйләшеү. Шыш-быш килеү.*

**3.** *и. мәғ.* Йәшерен һөйләп йөрөтөлгән һүҙ, хәбәр; ғәйбәт. *Председатель ҡатынының ҡайһы бер ҡылыҡтары хаҡында имеш-мимеш, шыш-быш тарала башлағайны инде.* Ғ. Аллаяров.

**ШЫШҠЫ** *и. диал.* Йышҡы.

**ШЫШТАЙЫУ** *ҡ.* Турыға ҡатыу; суҡайыу. *Шыштайып ултырыу.* ■ *Уба өҫтөндә йомрандар гәмһеҙ генә баҫҡан шыштайып.* Р. Бикбаев.

**ШЫШТЫРЛАУ** *ҡ.* Шыштыр-шыштыр итеү, шыштыр-шыштыр килеү. *Шыштырлап ҡуйыу.* ■ *Ҡамыштарҙан да эре булып үҫкән кукурузҙарҙың киң ҡыяҡтары әкрен иҫкән елдә шыштырлай.* Ә. Вәли.

**ШЫШТЫР-ШЫШТЫР** *оҡш.* Ҡағыҙ, кипкән үлән һәм башҡалар бер-береһенә тейгәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; ҡыштыр-ҡыштыр. *Шыштыр-шыштыр итеү. Шыштыр-шыштыр килеү.*

**ШЫШЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Шыш-шыш иттереү. *«Һин үҙең әллә ҡасан онотолғанды хәтерләп йәнде яфалама»,— тип тешһеҙ ауыҙы менән шышылдатып уға [Шамун ҡартҡа] ябырылды Шәмси ҡарсыҡ.* Д. Исламов.

**ШЫШЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Шыш-быш килеү. *Сәйнүктә сәй бығырлап ҡайнай, күҙ өҫтөнә шешләнгән балыҡтарҙан тамған май шышылдай.* Р. Низамов.

**2.** Өндәрҙе асыҡ әйтмәү; шыш-шыш итеү. *«Ниндәй үтенес ул, балаҡай?» тип, тешһеҙ ауыҙы менән шышылдап һораны Фәхерниса ҡарсыҡ.* Д. Исламов.

**ШЫЯ** *и.* **1.** Һыу өҫтөндәге туңып етмәгән ҡар ҡатыш боҙ; сыйҙым. *Агиҙелдә сайҡалышып аға үс аяһы хәтле шыялар.* Р. Бикбаев.

**2.** Ҡар аҫтына төшкән һыу. *Айбулат иртә яҙ башының ала ҡарында шыя ярып килде.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *диал.* Шайыҡ.

**4.** *диал.* Лайла. *Йүкә кипмәгән, шыяһы күп.*

**ШЫЯЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Шыялыға (2 мәғ.) әйләнеү, шыялы булыу. *Көн үҙгәндә шыялана башлаған Шишмә башы юлын итеге менән лыстырҙатып .. хәрби кейемле берәү артылды.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *диал.* Лайлалы булып, шыуып тороу.

**ШЫЯЛАУ** *ҡ. диал.* **1.** Шыялы итеү.

**2.** *күсм.* Арлы-бирле йыуыу йәки һөртөү. *Иҙәнде шыялап сыҡҡан.*

**ШӘБЕ**[1] *и.* Тырнаҡтың ҡырҡылмай ҡала торған яҫы өлөшө. *Шәбе төбө. Шәбе аҫты.* ■ *[Мөһөйә] имгәкләп ҡыуыш артына сыҡты. Бөтә көсө менән ҡарт ҡайындың суғырмаҡлы ҡабығына йәбеште. Тырнаҡтарының шәбеһен айырғанса ерҙе тырнаны.* Я. Хамматов.

**ШӘБЕ**[2] *и.* **1.** Буйлыҡтың аҫлы-өҫлө ебен айырыу өсөн иреш буйына ҡуйылған бау; шырпы. **Шәбе ҡайтарыу** (*йәки* **түгеү**) сүпләп, шәбеләр менән айырып ҡуйған биҙәкте ҡабатлап һуғыу.

**2.** *ҡар.* **шырпы**[2] 1.

**ШӘБӘЙЕҮ** *ҡ.* **1.** Нимәнеңдер тиҙлеге артыу; ҡыҙыу. *Шәбәйә барыу.* ■ *Башта кешеләр вагон янынан атлап барҙы, поезд шәбәйә төшкәс, йүгерә башланы.* М. Кәрим. / Көсө артыу; көсәйеү. *Буран шәбәйә. Ел шәбәйә.* ■ *Тора-бара ямғыр шәбәйҙе. Юлдағы соҡор-саҡырҙар күләүеккә әйләнде.* М. Тажи.

**2.** Яҡшы яҡҡа үҙгәреү; үҫеш алыу; һәйбәтләнеү; яҡшырыу. *Ямғырҙан һуң арыш бик шәбәйеп китте.* / *күсм.* Булдыҡлыға әйләнеү, шәп булыу, шәпкә сығыу. *Эшкә шәбәйеү. Уҡыуға шәбәйеү.*

**3.** Ауырыуҙан арыныу; һауығыу, арыуланыу. *Шәбәйеп барыу. Шәбәйә башланы.*

**ШӘБӘЙТЕҮ** *ҡ.* **1.** Тиҙлеген арттырыу. *Аҙымды шәбәйтеү.* ■ *Пароход оҙон ғына гудок бирҙе лә, мороно менән аҡ тулҡындарҙы яра-яра йөрөшөн шәбәйтте.* М. Тажи.

**2.** Яҡшы яҡҡа үҙгәртеү, яҡшыртыу. *Эште шәбәйтеү. Уҡыуҙы шәбәйтеү.*

**3.** Ауырыуҙан арындырыу; һауыҡтырыу, арыуландырыу. *Ауырыу баланы шәбәйтеү.* ■ *[Әбей:] «Ирем ауырый, шуны дауала»,— тигән. [Түрмән:] «Өс ҡыҙыңдың береһен бирһәң, шәбәйтәм»,— тигән.* «Башҡорт легендалары», 1969.

**ШӘБӘРЕЛЕҮ** *ҡ. һөйл.* Ныҡ һыуланып, өшөү, күшегеү. *Ямғыр аҫтында ҡалып шәбәрелеү.*

**ШӘБӘТ** *и. иҫк.* Дүҫ кеше, әшнә. *Шәбәт булыу.*

**ШӘГҮРӘКӘЙ** *и. диал.* Үтәбикә. *Шәгүрәкәй ояһы.*

**ШӘҒБАН** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ай календарының һигеҙенсе айы (*ҡар.* **календарь**).

**ШӘҒБӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит. кар.* **бүлек** 3. *[Ауырғазин:] Иптәштәр! Ырымбур революцион Советының Мәғариф шәғбәһе карарын уҡырға рөхсәт итегеҙ.* С. Агиш.

**ШӘҒЛӘ** [*ғәр.*] *и. кар.* **шөғлә.** *Яҙ килә, наҙлап кояш ергә һибә аҡ шәғләһен, баш әйә донъя көяшка, ынйылап пак кәғбәһен!* С. Ҡудаш.

**ШӘДДӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кар.* **тәштит.**

**ШӘДИДЛЕ** [*ғәр.* + *төрки*] *с. иҫк. кит.* Көслө. *Тышта шәдидле буран асыулы-асыулы рәғәшәләр илә уғылдай ине.* Ә. Таңғатаров.

**ШӘЖАҒӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Батырлыҡ, ҡыйыулыҡ. *Суяҙ исемендәге бер полковниктың тәдбир вә шәжағәте арҡаһында шәһәрҙе ташлап ҡасырға мәжбүр булдылар.* М. Һаҙыев.

**ШӘЖӘРӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Билдәле бер нәҫел-ырыуҙың килеп сығышын, таралышын күрһәткән генеалогик яҙма. *Шәжәрә китабы.* ■ *[Аҡһаҡал:] Бына ул тарих. Был — шәжәрә. Ауылыбыҙҙың, еребеҙҙең тарихы. Уға дүрт йөҙ йыл!* Ә. Вахитов. *Беҙҙең нәҫел борон-борондан иген игеп ғүмер кисергән. Шуны һөйләй бабай төҙөгән шәжәрәгә ингән исемдәр.* М. Сөндөклө.

**2.** Ағас.

◆ **Шәжәрә ағасы** нәҫел-ырыуҙың тармаҡланып китеүен күрһәткән һыҙма.

**ШӘЙ**[1] [*ғәр.*] *и.* **1.** Үҙ сифаты, рәүеше булған нәмә; әйбер. *Мин китер саҡта ғына һөйкөмлө күренә һәммә шәй, барлығы шат, барыһы яҡты, барыһы нурлы мисле ай.* Ш. Бабич.

**2.** Нимәнеңдер яйы, рәте. *Председатель .. маҡтанып алырға шәй сығыуына ҡыуанды.* Т. Килмөхәмәтов.

**3.** *бәйл. мәғ.* Нәмәнең сифатын йәки ҡылығын икенсе нәмәнең сифаты, ҡылығына оҡшатҡанда ҡулланыла; шикелле, һымаҡ. *[Кәмилә:] Иллә яратам да .. моңло йырҙы! Йөрәгемдән ебәк еп үтеп киткән шәй була.* М. Кәрим.

◆ Лә шәй *иҫк.* бер ни ҙә түгел. *Һүҙҙәренең эстәлеген аңлатты был [мулла]. Бының янда башҡа кеше имеш лә шәй!* М. Ғафури. **Шәй күрмәү** бер нәмәгә лә һанамау. *Алдынан ҡош уҙғармаҫ, ҡая һыуҙы шәй күрмәҫ үтә һылыу ҡара ат.* М. Буранғолов. **Шәй түгел** башҡарыуы, үтәүе бер ни түгел; еңел тигән мәғәнәлә ҡулланыла. *Уны эшләү миңә шәй түгел.*

**ШӘЙ**[2] [*рус.* чай] *мөн. һөйл. кар.* **шикелле** 2. *Килгән шәй.*

**ШӘЙЕ** *бәйл. кар.* **шайы.** *Көтөүгә шәйе сәй эсеп алайыҡ.* ■ *[Ағайым:] Эшләп, эшләп, әлегә шәйе бер кемдең дә хур булғаны юҡ. Эш ҡайғыны баҫа, күңелде аса тигәндәре хаҡтыр.* Р. Әхтәров.

**ШӘЙЕХ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Мосолмандарҙағы юғары дәрәжәле дин әһеле. *Шәйех булыу.* ■ *Мөриттәре иһә, ҷәйех бойорһа, шәйех өсөн балаларын да ҡорбан ҡылалар.* З. Һаҙыев.

**2.** Яҡын һәм Урта Көнсығыштағы ҡайһы бер халыҡтарҙа ауыл старостаһы.

**ШӘЙКҮЛӘН** *и. диал.* Һары мәтрүшкә. *Шәйкүлән йыйыу.*

**ШӘЙЛЕ**[1] *бәйл. диал.* Һымаҡ, кеүек. *Кит, шул да булдымы бәхәс! — тине бер ҡыҙ. Етем быҙау сепрәк имгән шәйле, билләһи!* М. Кәрим.

**ШӘЙЛЕ**[2] *с. диал.* Абай. *Был хәл Яҡупты шәйлерәк булырға мәжбүр итте.* Б. Бикбай.

**ШӘЙЛӘК** *и. иҫк. кит.* Разведка йәки һаҡ өсөн ебәрелгән бәләкәй төркөм һәм шул төркөм кешеһе; дозор. *Төнгө шәйләк.* ■ *Туҡтау менән уҡ төрлө тарафҡа шәйләктәр ебәрелгәйне.* Ғ. Ибраһимов.

**ШӘЙЛӘМӘҪТӘН** *р.* Һис көтмәгәндә; ҡапыл, аңғармаҫтан. *Уйламаҫтан, көтмәҫтән, шәйләмәҫтән-нитмәҫтән Башҡортостан буйында, урманында, ҡырында .. булды бик ҙур үҙгәреш, йәмле шатлыҡ ҡуҙғалыш.* Ш. Бабич.

**ШӘЙЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Күренерлек, иғтибар итерлек хәлдә булыу. *Беҙҙең алда хәҙер болоттарҙан төшкән ай яҡтыһында яҡшы уҡ асыҡ шәйләнгән ҡарлы туғай, уның аръяғында ҡуйы ғына урман ҡараҫҡылланып күренде.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** *диал.* Әҙерләнеү. *Китергә шәйләнеү.*

**ШӘЙЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Кем йәки нимәнелер аҙ-маҙ ғына күреп ҡалыу; абайлау. *Шәйләп ҡалыу.* ■ *Төн ҡараңғы. Тик шәйләйнем ҡатындарҙың аҡ һындарын.* М. Кәрим. *Шаҡтай барғас, беҙҙән уңда күмәк кеше килгәнен шәйләнек.* Ғ. Ғүмәр. / Айыра асыҡ күреү. *Саңғысылар костюмында булғанлыҡтан.., уның ирме, ҡатын-ҡыҙмы икәнлеген шәйләп булмай.* Н. Мусин.

**2.** Абайлап алыу; һиҙеү, аңғарыу. *Ҡыҙҙар һырып алған Сабир шәйләмәне ҡурҡынысты.* Р. Бикбаев. *Гөлйөҙөм председателдең кәйефе ҡырылыуын шәйләмәй ине.* Я. Вәлиев.

**3.** *диал.* Әҙерләү. *Баланы мәктәпкә шәйләү.*

● *Ай кәртәләнһә, айлыҡ аҙығыңды шәйлә, көн кәртәләнһә, көрәгеңде шәйлә.* Мәҡәл.

**ШӘЙМЕК** *и. диал.* Түңгәк.

**ШӘЙТ** [*рус.* чать] *мөн. диал.* Моғайын.

**ШӘЙӘТ** [*фарс.*] *мөн. диал. кар.* **бәлки** 2. *Тырышлығың арҡаһында кеше булһаң, милләтеңә күрһәтерһең шәйәт бер эш.* М. Ғафури.

**ШӘК** *и.* Балалар уйыны (бер оҙон таяҡ, бер ҡыя башлы бәләкәй таяҡ алына; уйнаусылар икегә бүленә: бер төркөмө көтә — икенсеһе уйынды алып бара, йәғни таҡтаның осо менән сиртеп, ҡыйыҡбашты һикертә лә һуғып: оҙатып ебәрә; көткән кеше уны тоторға йәки алып, кире ояға ташларға тейеш); шөгөлөй. *Шәк уйыны. Шәк таҡтаһы. Шәк һуғыу.*

**ШӘКЕЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Нәмәнең тышҡы рәүеше, күренеше; форма. *Сайпыла, ситтәргә ҡағыла инҡилап тулҡындары, мең шәкел, мең төрлө төҫтә ихтилал упҡындары.* С. Ҡудаш.

**2.** Ниҙеңдер шартлы билдәһе; тамға. *Ҡасандыр, радио, телефон, телеграфтар булмаған, кеше һүрәттәр, шәкелдәр аша булһа ла бәйләнеш, үҙ-ара аңлашыу сараһын тапҡан бит.* Б. Бикбай.

**ШӘКЕРТ** [*фарс.*] *и.* **1.** *иҫк.* Мәҙрәсә уҡыусыһы. *Шәкерт булыу.* ■ *Хәлфә ултыртты шәкерттәрҙе теҙеп, теҙләндереп һәм шәкерттәрҙе ҡарап торҙо бер аҙ күҙ яндырып.* Ш. Бабич.

**2.** *ҡусм.* Кемдәндер белем алып, өйрәнеп, уның эшен дауам иткән кеше.

**3.** Кемдеңдер етәкселегендә нимәгәләр өйрәнгән кеше; өйрәнсек уҡыусы.

**ШӘКЛЕ** *и. диал.* Сабаҡ [1].

**ШӘКӘЙ** *и. диал.* **1.** Бәкәл.

**2.** Балалар уйыны (арҡыры һыҙыҡҡа теҙеп ултыртылған бәкәлсәйҙәргә ситтәге бер билдәнән

тороп һуҡҡыс менән бәрәләр, йығылғанын уйнаусы үҙенә ала, теймәй аша барып төшһә, кирегә әйләнеп тағы бәрәләр; был юлы кемдеке яҡынығраҡ төшкән, шул башлап ебәрә. Һуҡҡысҡа ҡурғашлап яһалған шул уҡ бәкәлсәйҙе ҡулланырға мөмкин. Йығылған бәкәлсәйҙе һуҡҡысы йөҙ түбән төшкән кеше генә ала, салҡан төшһә, алмай, кире ултырта); шәкәй һуғыу.

**ШӘКӘЛ(ТӘЙ)** *и. диал.* Бәкәл.

**ШӘКӘР** [*фарс.*] *и.* **1.** Татлы сөгөлдөр йәки үҙенә бер төрлө ҡамыштан алынған татлы аҡ кристаллик матдә. *Ваҡ шәкәр. Шаҡмаҡлы шәкәр. Шәкәр заводы.*

**2.** *махс.* Углеводтар төркөмөнә ҡараған төрлө органик ҡатышма. *Йөҙөм шәкәре. Һөт шәкәре.*

♦ **Шәкәр ауырыуы** тәнгә үҙләшмәүе арҡаһында бәүелдә һәм ҡанда шәкәр күбәйеүҙән килгән ауырыу; шәкәр диабеты.

**ШӘКӘРЛЕ** *с.* Шәкәре булған, татлы. *Шәкәрле сәй.*

**ШӘКӘРЛЕЛЕК** *и.* Нимәнеңдер составындағы шәкәрҙең миҡдарын билдәләй торған күрһәткес. *Сөгөлдөрҙөң шәкәрлелеген күтәреү.*

**ШӘКӘРЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Шәкәргә әйләнеү, шәкәр һымаҡ булыу. *Шәкәрләнгән бал.*

**2.** Шәкәр менән ҡатыштырыу. *Шәкәрләнгән балан. Шәкәрләнгән еләк.*

**ШӘКӘРЛӘҮ** *к.* Шәкәрле итеү. *Баланды шәкәрләү.*

**ШӘКӘРӘ** *и. кар.* **шекәрә.**

**ШӘЛ** [*фарс.*] *и.* Бәйләнгән йәки һуғылған ҙур яулыҡ. *Дебет шәл. Мамыҡ шәл. Биҙәкле шәл. Ебәк шәл. Шәл суғы.* ■ *Зәбирә иңбашына мамыҡ шәл һалып, ҡапҡа төбөнә сыҡты.* С. Агиш. **Ҡалын шәл** ҡышын кейем өҫтөнән ябына торған һуҡҡан ҙур йылы шәл. *Ул да [Мәгфиә лә] биш билле әҙрәс бишмәттән, эре суҡлы ҡалын шәлдән ине.* Б. Бикбай. **Ҡыя шәл** бәләкәй өҫкөл шәл. *Зөлхәбирә һылыу намаҙ уҡый ҡыя шәлен ябып башына* (Халыҡ йырынан). **Селтәр шәл** аҡ ебәктән, йөндән селтәрләп бәйләнгән йоҡа шәл. *Башына аҡ селтәр шәл бөркәнгән бер ҡыҙ килеп инде.* Т. Йәнәби. **Тула шәл** һарыҡ йөнөнән һуғылған шәл, йөн шәл.

**ШӘЛБЕРӘҮ** *к.* **1.** Шиңеп, һулып һалынып төшөү. *Ҡороға шәлберәү. Эҫегә шәлберәү.*

**2.** *күсм.* Ҡаушап, ебеп төшөү; бәлйерәү. *Ә алдында торған комиссарҙарҙың .. шәлберәп төшкәнен күреп, улар аптырап ҡалдылар.* И. Насыри.

**ШӘЛИӘТҺЕҘ** *с. диал.* Килбәтһеҙ. *Шәлиәтһеҙ кеше.*

**ШӘЛКЕМ** *и.* **1.** Ҡуша бәйләнгән бер төрлө нәмәләр йыйымы; бәйләм. *Бер шәлкем сәскә. Бер шәлкем етен сүсе.* ■ *Бер аҙҙан һуң ул [Вәзир] ҡамыш төбөндәге йәш күрәнде шәлкем итеп усына йыйып тотто ла ат ҡойроғо төйнәгән кеүек, төйнәп ҡуйҙы.* М. Кәрим. / *күсм.* Берәй темаға ҡараған шиғырҙар циклы. *Мин октябргә, партияға, Тыуған илгә бағышланған шиғырҙар яҙыуҙы дауам итәм. Ул шәлкемгә ингән шиғырҙар хәҙер байтаҡ күбәйҙе.* С. Кулибай.

**2.** Берәй яҡтылыҡ сығанағынан һирпелгән саҡҡылар көлтәһе. *Нур шәлкеме.* ■ *Күп тә үтмәне, бөгөлөш яғынан пароход тауышы ишетелде. Унан ҡараңғы йылға өҫтөндә уттар шәлкеме һуҙылды.* З. Хисмәтуллин.

**ШӘЛКЕМЛӘНЕҮ** *к.* Шәлкем-шәлкем булыу; бер ергә ойошоу. *Шәлкемләнеп йығыла ебәк үлән, ярһып, ярышып эшләй һәр кеше.* Б. Вәлит.

**ШӘЛКЕМЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **шәлкемләү.**

**ШӘЛКЕМЛӘҮ** *к.* Шәлкем-шәлкем итеү, шәлкем яһау, шәлкемле итеү. *Шәлкемләп һалыу. Шәлкемләп бәйләү. Епте шәлкемләп ҡырҡыу.*

**ШӘЛНӘ** *и. диал.* Төйрәүес. *Кулмәк иҙеүен шәлнә менән ҡаптырыу.*

**ШӘЛПӘЙЕҮ** *к.* **1.** Үҙ рәүешен юғалтып йәйелеү; йәлпәйеү, бәлшәйеү. *Ямғырға эшләпәһе шәлпәйгән.*

**2.** *күсм.* Хәлһеҙләнеп һалыныу, бәлйерәү. *[Сәлимйәндең] мыйыҡтарына тиклем тирләп, шәлпәйеп төштө.* Ғ. Шәрипов.

**ШӘЛТӘҮ** *и.* **1.** Бил ҡайышына балта һәм баш ҡалар тағыу өсөн эшләнгән элмәкле бау; тоҡан.

**2.** *диал.* Ишек тотҡаһы. *Ишек шәлтәүе.*

**3.** *диал.* Салбарҙың ҡапламаһы. *Салбар шәлтәүен ҡаптырыу.*

**ШӘЛШЕ** *и.* Тағанға өйөлгән тары көлтәләре; тары һоҫланы. *Баҫыуға барып инһәм, ни күҙем менән күрәйем, беҙҙең туры ат «Урыҫ Кәрим» тигән кешенең тары еренә инеп, уның бер шәлшеһе янында тора.* М. Ғафури.

**ШӘЛЬЯУЛЫҠ** *и.* Ситтәре эре биҙәкле ҙур кешмир яулыҡ. *[Фәриҙә еңгә] янып торған ҡыҙыл биҙәкле шәльяулығын ябынып, Алмаларға килеп инде.* Ҡ. Ибәтуллин.

**ШӘЛӘПӘ** *и.* Һәт туҫтағы. *Һөттө шәләпәгә һалыу.*

**ШӘМ** [*гәр.*] *и.* **1.** (*йәки* **май шәм**) Парафин, балауыҙ һымаҡ яна торған нәмәнән уртаһына милтә ҡуйып, таяҡ рәүешендә итеп яһаған яҡтыртҡыс. *Стеарин шәм. Шәм төбө.* ■ *Ярлы булып, һаҫыҡ май шәм яғып, ғүмер иткән халыҡ уфтанып.* Х. Ҡунаҡбай. / Төрлө рәүештәге яҡтыртҡыс нәмә; лампа. *Кәрәсин шәме. Электр шәме. Аҫмалы шәм. Ултыртмалы шәм. Шәм яҡтыһы. Шәм тоҡандырыу. Шәмде һүндереү.* ■ *Милтәһен ҡыҫып, һүндермәй ҡалдырған яңғыҙ шәм яҡтыһы ғына үҙҙәренең тәҙрәһе аша күренә.* Я. Хамматов. *Яҡты шәм янында бер ҡыҙ йырлай-йырлай йөн иләй.* М. Абдуллин. **Һуҡыр** (*йәки* **йылтын**) **шәм** ҡыуыҡһыҙ кәрәсин шәме. **Шәмгә ут алыу** лампаға ут тоҡандырыу. *Өҫ-башы лыс һыу булған Нурғәли шәмгә ут алғас ҡына ҡайтып инде.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *күсм.* Алға әйҙәгән нәмәгә ҡарата әйтелә. *Күңел шәме. Өмөт шәме.* ■ *Тәүҙә тартыш, дауыла үҙ хаҡыңды, ал хөрриәт шәмен ҡулыңа.* Д. Юлтый. / *күсм.* Кешенең йәшәү билдәһе. *Әсәйемдең һүнде шәмдәре, һүнде донъя тормош йәмдәре.* М. Басыров. *[Көбәк:] Инде минең шәмәм һүнеп бара.. Көтөп оҙаҡ ята алмамын.* Б. Бикбай.

**3.** Нефть скважинаһына төшөрөү өсөн бер-береһенә ялғанған торбалар һуҙымы. *Торбаның «шәм» тип аталған ялғамдарының унлабын ғына өҫкә күтәреп, вышка эсенә һөйәп ҡуйғандар.* Ғ. Ибраһимов.

♦ **Шәм кеүек** (*йәки* **шикелле**) 1) төп-төҙ нәмәгә ҡарата әйтелә. *Юлдың ике яғында ла ҡарт*

*карағайҙар, шәм кеүек төҙ шыршылар.* М. Тажи; 2) һерәйеп торыға ҡатып ҡалған кешегә әйтелә. *Беҙ шәм кеүек ҡатып ҡалдыҡ.* Ә. Харисов. **Шәм менән эҙләһәң дә тапмаҫһың** *шул уҡ* **көндөҙ сыра яндырып эҙләһәң дә тапмаҫһың** (*кар.* эҙләү).

**ШӘМБЕ** [*фарс.*] Аҙнаның алтынсы көнө. *Шәмбе арты. Шәмбе көн.* ■ *Бөгөн генә йома, иртән — шәмбе, береһе көнгә — урыҫ аҙнаһы. Көндәр юрта шулай бер-бер артлы, асыла, ябыла ғүмәр ҡапҡаһы.* Ғ. Амантай.

**ШӘМДӘЛ** [*фарс.*] *и.* **1.** Май шәмен ултырта торған махсус ҡулайлама. *Иҙән уртаһында гәжәп йыуан ағастан быҫып алынған түмәр тора. Уның өҫтөндәге борондан ҡалған шәмдәлдә май шәм яна.* «Ағиҙел», 1966, № 11.

**2.** Бер нисә шәмдән торған аҫмалы яҡтыртҡыс; люстра. *Хрусталь шәмдәл. Шәмдәл элеү.* ■ *Алпаров ишек төбөнә барып, включателде бороп ебәрҙе. Түшәм шәмдәле гөлтләп тоҡанды.* Я. Вәлиев.

● *Шәмдең йәме шәмдәл менән.* Әйтем.

**ШӘМНЕК** *и. диал. кар.* **асамай** 1.

**ШӘМНӘҮ** *ҡ.* Сөрәкәне күтәреп, таяҡ менән һуғыу. *Сөрәкә шәмнәү. Шәмнәлгән сөрәкә.*

**ШӘМСЕ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡояш.

**ШӘМСИӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Ерҙең Ҡояш тирәһендә әйләнеп сығыуы буйынса хисапланған йыл иҫәбе.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ШӘМ-СЫРАҠ** *и. йыйн.* Ут яҡтыһы бирә торған төрлө яҡтыртҡыс.

**ШӘМСЫРАҠ** *и.* Аҫыл таш. *Урал шәмсыраҡтары. Шәмсыраҡ ҡашлы йөҙөк.* ■ *Шәмсыраҡтар баҙлағанда бакканым бар хозурланып.* А. Игебаев.

♦ **Шәмсыраҡ ҡорт** *диал.* быҙлауыҡ.

**ШӘМТЕРӘҮ** *ҡ. диал.* **1.** Шамтырау.

**2.** Бәлйерәү. *Шәмтерәп төшөү.*

**ШӘМӘК** *и. диал.* Ашыҡ.

**ШӘМӘН** *с. диал.* Аңыш. *Шәмән кеше. Шәмән булыу.*

**ШӘМӘРЕЛЕҮ** *ҡ. кар.* **шәмәреү.**

**ШӘМӘРЕҮ** *ҡ.* **1.** Болотлап ҡараңғыланыу, томһаланыу. *Көн томһалана, шәмәрә барҙы.* З. Биишева. *Күк йөҙө шәмәреп тора ине.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Күҙ ҡабағы ҡыҙарып, иларға йәтешләнеү, йәшләнеү (күҙгә ҡарата). *Ул [Йәнтимер] шәмәргән күҙҙәрен асалаҡ-йомалаҡ итеп, бер һүҙһеҙ тора бирҙе.* Ғ. Вәлиев. / *кәмһ.* Илау, йәш түгеү. *[Хөппөниса:] Ярар, шәмәрмә! Үҙең гәйепле!* Я. Хамматов.

**ШӘМӘРТЕҮ** *ҡ.* Йәшләндереү. *Күпте күргән ауыл ҡарттары ла шәмәрткәндәр шул мәл күҙҙәрен.* Б. Вәлит.

**ШӘМӘХӘ** *с.* Көрән күк. *Шәмәхә ҡара. Шәмәхә ҡәләм менән яҙыу.* ■ *[Хөсәйен хажиҙың] күҙҙәре тағы ла нығыраҡ ҡыҙарған, электән дә шәмәхә танауы тағы ла бүртенгән.* А. Таһиров.

**ШӘМӘХӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Шәмәхә төҫкә инеү; күгәреү.

**ШӘҢГЕ** *и. кар.* шәңкә.

**ШӘҢГӘЛ** *и.* Йыртҡыс ҡош тырнағы, типкеһе.

**ШӘҢКӘ** [*рус.* шаньга] *и.* Ике иләләй ҡалынлыҡтағы әсе йәймә өҫтөнә эремсек, картуф һ. б. һалып бешерелгән ҡамыр ашы. *Еләк шәңкәһе. Картуф шәңкәһе. Эремсек шәңкәһе. Шәңкә бешереү.* **Таба шәңкәһе** йоҡа ғына әсе йәймәгә эремсек йәки картуф һылап табала бешергән икмәк (майға манып ашайҙар).

**ШӘП** **1.** *р.* Тиҙ генә ҡыҙыу итеп, йәһәт; *киреһе* экрен. *Шәп атлау. Шәп барыу.* ■ *[Йүгерек батыр] бик шәп китеп, тыйыла алмайынса, ҡуяндыуҙа ла китә, уҙа ла китә икән* (Әкиәттән). / Ашыҡтырып, йәһәтләп. *[Ғамир] Атты бик шәп ҡыума..— тине.* Б. Бикбай.

**2.** *с.* Маҡтауға лайыҡлы; яҡшы, һәйбәт; *киреһе* насар. *Шәп кеше. Шәп китап. Шәп күрше. Шәп һөнәр.* ■ *Шәп кеше ул беҙҙең Дауытов, аҡыл эйәһе! — тине Ғәләү һәм, һул күҙен ҡыҫа төшөп, баш бармағын күрһәтте.* Б. Бикбай. *Байҙың кәртә-ҡураһы бөтөн, йорт-йыһазы шәп, мал-тыуары күп, ти* (Әкиәттән). // *Шәп уҡый. Шәп кейенә.*

**3.** *с.* Үҙ эшен, һөнәрен яҡшы белгән; оҫта. *Шәп врач. Шәп йырсы. Шәп тимерсе.* // *Шәп йырлай. Шәп уҡыта.*

**4.** *с.* Сәләмтлеккә, хәл-әхүәле яҡшы: ауырыу-сырхауһыҙ, һау-сәләмәт. *Шәп карт.* ■ *Ике өйҙөң ҡарттарын ул [Сафура] ғына күтәрмәләп йөрөй әле. Бик шәп ул.* Һ. Дәүләтшина. // *Шәп йөрөп ҡайтыу. Өйҙәгеләр шәп торған.*

♦ **Шәп булды** (*йәки* **иттең**) эш-ҡылыҡты хуплағанда әйтелә. *Иртә ҡайтып шәп иттең.* **Шәптән түгел** эш-тормош хәле насар, күңелһеҙ булғанда әйтелә. *Эш шәп түгел.* ■ *Класыңда тәртип шәптән түгел икән.* М. Тажи. **Шәпме(һегеҙ)** осрашҡанда иҫәнләшеү һүҙе. *Нихәл, ҡыҙый, шәпме? — тине Шакир.* Ғ. Хәйри.

● *Шәп үҙен бөтөрөр, әкрен эшен бөтөрөр.* Әйтем.

**ШӘП-** *киҫ.* **Шә-** ижекенә башланған сифатҡа ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһен бирә. *Шәп-шәрбәт.* ■ *Аҡ ҡайындар инде һап-һарылар, ә уҫаҡтар ҡалған шәп-шәрә.* Ғ. Әмири.

**ШӘПКӘ** [*рус.* шапка] *и.* Көлтәләрҙе баштарын бер-береһенә терәтеп, өҫтән береһен ҡаплап һалынған һоҫлан; ҡырлыҡ. *Шәпкә ултыртыу.*

**ШӘПЛЕ** *с.* **1.** Булдыҡлы, уңған, егәрле. *Шәпле килен. Шәпле булыу.*

**2.** Сәләмәтлеге, хәле яҡшы (оло кеше йәки балаға ҡарата); ныҡлы, һауһаҡ. *Шәпле бала. Шәпле бабай.*

**ШӘПЛЕК** *и.* **1.** Булдыҡлылыҡ, уңғанлыҡ; егәрлелек. *Шәплек күрһәтеү.* ■ *[Йәнтимер] үҙенең уҙған йылғы шәплектәрен һөйләй башланы.* С. Агиш.

**2.** Шәп кешегә, яҡшы нәмәгә хас сифат. *Күндең шәплеге тиренән.*

**3.** Иҫәнлек, һаулыҡ. *[Кәҙерғол:] Нихәл, шәпме? [Әхмәт:] Шәплек үҙегеҙ күргәнсә.* А. Таһиров.

**ШӘПЛӘНЕҮ** *ҡ.* Булдыҡлыға, уңғанға, шәпкә әйләнеү; шәп булыу. *Шәхми бай шәпләнде лә китте: «Ах, жулик!.. Сығып кит, күҙемә күренмә!» — тип, инспекторҙы пыр туҙҙырып ҡыуалай башланы.* Т. Йәнәби.

**ШӘПЛӘТЕҮ** *ҡ.* Ҡыҙыулатыу, йәһәтләтеү. *Аҙымды шәпләтеү.* ■ *Күсер аттарҙы шәпләтеп ҡыуып ҡалаға алып инеп китте.* С. Кулибай.

**ШӘПЛӘҮ** *к.* Ҡыҙыулау, йәһәтләү; шәп (1 мәғ.) итеү. *Шәпләп атлау. Шәпләп килеү. Шәпләп ҡыуыу.* ■ *Әхмәҙи өҫтәлгә кире бороллоп өлгөрмәне, Хөсәйен шәпләп килеп инде.* Һ. Дәүләтшина.

**ШӘПРӘ** *с. диал.* Бысраҡ. // *Өҫтө-башын шәпрә йөрөтә.*

● *Ҡатының һәпрә булһа, өҫтөң шәпрә булыр.* Әйтем.

**ШӘПРӘЙЕҮ** *к.* **1.** Шәпрәгә әйләнеү, шәпрә булыу. *Шәпрәйеп йөрөү.*

**2.** *диал.* Шәлпәйеү. *Ҡыраууҙан һуң япраҡтар шәпрәйеп ҡалды.*

**ШӘПӘРЕЛЕҮ** *к. диал.* Күшегеү. *Ямғыр аҫтына ҡалып шәпәрелеү.*

**ШӘР** *и. иҫк. кит.* Яуызлыҡ. *Яман әҙәм шәренән һаҡлан.*

**ШӘРБӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Емеш һутынан яһалған татлы эсемлек. *Шәрбәт эсеү.* ■ *Һыу һораһаң, шәрбәт бирә беҙҙең колхоз ҡыҙҙары* (Халыҡ йырынан). / *күсм.* Йөҙөм шарабы. *Бокалдарҙа шәрбәт тулы, һәр нәмә үҙ урынында.* Х. Кәрим.

**2.** Төрлө емешкә кофе, шоколад, шәкәр ҡушып яһалған татлы ашамлыҡ. *Сәйҙе шәрбәт ҡушып эсеү.*

**3.** Үҫемлек сәскәләрендә була торған татлы һут; нектар. *Юлдаш булып осоп бал ҡортона татып ҡайтам гөлдәр шәрбәтен.* М. Ғәли.

**ШӘРБӘТЛЕ** *с.* Шәрбәте булған; татлы. *Шәрбәтле сәй.*

● *Килен килбәтле булһын, һүҙе шәрбәтле булһын.* Мәҡәл.

**ШӘРБӘТЛӘНЕҮ** *к.* Татлыға, шәрбәтлегә әйләнеү, шәрбәтле булыу; татлыланыу. *Алмаларҙың алтын төҫкә инеп, шәрбәтләнеп бешкән бер мәле.* Ғ. Рамазанов.

**ШӘРБӘТЛӘҮ** *к.* Шәрбәтле итеү; шәрбәт һалыу. *Сәйҙе шәрбәтләү.*

**ШӘРҒЕ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **шәриғәт.** *Шәрғенән тыш тәрәҡҡиәттең татын алмаҫ — алған суфый баҡсаһында үҫер имде* (Мөнәжәттән).

**ШӘРҒИ** [*ғәр.*] *с.* Шәриғәткә бәйле. *Һеҙҙең ҡарашығыҙ фәлсәфи ҙә, шәрғи ҙә түгел.* Т. Йәнәби.

**ШӘРҒИӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Законлылыҡ.

♦ **Хәйләи шәрғиә** законлы хәйлә. *Хәйләи шәрғиә яһау.* ■ *[Туҡтамышев:] Юҡ, хәҙрәт, бында бер аҙ хәйләи шәрғиә .. Пугачёв тиҙ генә килмәҫ әле.* Б. Бикбай.

**ШӘРҘӘК** *и. диал. ҡар.* **бүләк**[3].

**ШӘРЕ** *и.* **1.** Боҙ өҫтөнә сыҡҡан һыу. *Шәре сыҡҡан. Шәре ҡалҡыу. Шәре һыуы.* ■ *[Ат] боҙ өҫтөндәге шәрене сәсрәтеп сыҡҡанда ла туҡтап торманы.* Я. Хамматов. / *диал. ҡар.* **шыя** 2.

**2.** Ер өҫтөнә күләүекләнеп йыйылған ямғыр йәки ҡар һыуы. *Быҫҡаҡ ямғыр һибә. Сиҙәм ергә шәре булып һыуҙар төшәлә.* З. Биишева.

**3.** Ағастан һарҡҡан һары һыу. *Имгәнеп бөткән уҫаҡ олондарынан тутлы шәре аға.* // *Шәре утын.* ■ *Шәре ағасты тумыра-тумыра беләк һыҙлап бөттө.* М. Тажи.

♦ **Шәрегә ултыртыу** *диал. шул уҡ* **тишек шүмәнгә ултыртыу** (*ҡар.* **шүмән**[1]).

**ШӘРЕҠ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Ҡояш сыҡҡан тараф (донъя тарафтарынан береһе); көнсығыш. / Офоҡтоң кире тарафтағы өлөшө. *Шәреҡ яғы.* ■ *Шәреҡтә ҡып-ҡыҙыл уттар яна, ялт-йолт итеп балҡый.* М. Ғафури. **Шәреҡ йәнүби** көньяҡ көнсығыш.

**2.** Ҡояш сыҡҡан тарафтағы ер һәм илдәр. *Шәреҡ баҙары. Шәреҡ халҡы.* ■ *Шәреҡтә ямғыр тамсыһы тураһында атаҡлы бер парса бар.* Ғ. Хөсәйенов. *Ағастан эшләнгән был һауыт шәреҡ халҡы орнаменты менән биҙәкләнгән.* С. Агиш.

**ШӘРЕҮ** *к.* **1.** Һыу булыу, һыуланып иҙелеү (ер өҫтөнә ҡарата). *Аяҡ аҫты шәреп ята.*

**2.** Боҙолоп, сереп һыулыға әйләнеү. *Туңған картуф шәрене.* / *күсм.* Көсһөҙләнеү; ҡарыу бөтөү. *Дәрте һүнгән, ашмай ғәмәлгә, рух шәрегән, кәйеф төшөнкө.* Й. Гэрәй.

**ШӘРЕХ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Аңлатма. *Шәрех биреү. Шәрех яҙыу.* ■ *Тажетдин Ялсығолов үҙенең фарсы, ғәрәп, төрки телдәрен яҡшы белеүен, оригиналь әҫәрҙәр яҙыуҙан бигерәк, башҡа авторҙарҙың китаптарын тәржемә итеү һәм уларға шәрех биреү өсөн файҙаланған.* Ә. Харисов.

**ШӘРЕХЛЕ** *с. иҫк. кит.* Аңлатмаһы булған, аңлатмалы. *Шәрехле китап. Шәрехле һүҙлек.*

**ШӘРЕХЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **шәрехләү.** *Серле әҙәмдең серен асырыу, әҫәрҙең тел төбөн шәрехләтеү теләге ғәрәп әкиәттәрендәге алтын балыҡтың серҙәрен һөйләтеү менән бер булыр ине.* Ғ. Хөсәйенов.

**ШӘРЕХЛӘҮ** *к. иҫк. кит.* Аңлатма биреү; аңлатыу. *Шәрехләп һөйләү.* ■ *[Батырша] көрьәнде шәрехләп уҡыр, ғәрәпсә яҡшы белер булған.* Ғ. Хөсәйенов.

**ШӘРЕХСЕ** *и. иҫк. кит.* Аңлатма биреүсе. *Шәрехсе булыу.*

**ШӘРИҒӘТ** [*ғәр.*] *и. дини* Дәүләт дине булып ислам һаналған ҡайһы бер илдәрҙә мосолмандар өсөн мәжбүри булған ҡанундар йыйылмаһы. *Шәриғәт законы. Шәриғәт ҡушмаған эш.* ■ *Ғәҙелһеҙлеккә ҡоролған иҫке донъяла шәхестең бер генә лә хоҡуғы юҡ, ул алла һәм батша ҡоло, шәриғәт һәм закондар тарафынан иҙелгән кеше.* Ғ. Рамазанов.

● *Шәриғәт — сей тире, ҡайҙа тартһаң да һуҙыла.* Әйтем.

**ШӘРИҒӘТЛӘҮ** *к. һөйл.* Шәриғәт менән нигеҙләү; шәриғәт ҡушҡанса эш ҡылыу. *[Кинйәбай:] Бар, хәҙрәт, һин бер яҡтараҡ тор, күп шәриғәтләнең инде.* С. Мифтахов.

**ШӘРИҠ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Бер класта уҡыған кеше; һабаҡташ, класташ. *Шәриҡ булыу.* ■ *[Шәриф:] Ғабдрахман бит беҙҙең шәриҡ — бер класта уҡыйбыҙ.* Ғ. Ғүмәр. *Борон-борон заман бер бик ҙур мәҙрәсәлә өс шәкерт бергә шәриҡ булып уҡый ине, ти* (Әкиәттән).

**2.** Берәй эштә ярҙамсы, иптәш. *Өс йөҙ алтмыш бәлүән шәриҡ алған, бәйге бүртә ғинуарын менеп алған.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ШӘРИҠТӘШ** *и. иҫк. ҡар.* **шәриҡ 1.** *Шәриҡтәш булыу.*

**ШӘРИР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Яуыз, уҫал. *Шәрир кеше.*

**ШӘРИФ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* (*күберәк аныҡланыусы һүҙҙән һуң килә*). **1.** Хөрмәтле, ҡәҙерле,

данлы; оло. *Ватан шәрифе. Исем шәрифтәре.* / *с. мәг.* Шаяртып әйтелә. *Аяҡ шәрифтәре.* ■ *Бер заман ҡоймаҡ шәрифтәрҙән тамам елдәр иҫә.* Ш. Бабич.

**2.** Изге. *Ҡөрьән шәриф.* ■ *Беҙ һуғышҡа сығып киттек рамазан шәриф айында* (Бәйеттән). *Ғәзиз ине уның йәндәре, шәриф ине уның тәндәре* (Бәйеттән).

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ШӘРҠИ** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Көнсығышҡа бәйле, көнсығыштағы. *Шәрҡи ил.*

**ШӘРР** *и. иҫк.* Яман эш, яуызлыҡ. *Яман әҙәм шәрренән һаҡла.*

**ШӘРУҠ: шәруҡ ҡылыу** ҡарар итеү. *Был ҡәдәр хәлдәрҙе аңламаҡтан һуң, шәруҡ ҡылдым тәҙкир вә тәхрифнамә яҙмаҡҡа.* «Батыршаның хаты».

**ШӘРӘ** *с.* **1.** Өҫтөндә бер нәмәһе лә булмаған; яланғас. *Шәрә кеше.* ■ *Әсәнән тыуған шәрә бала кейем кейеп биҙәлә.* М. Буранғолов. / Кейем менән ҡапланмаған, асыҡ; яланғас (айырым ағзаға ҡарата). *Шәрә тән.* ■ *Бесәй ырғып уның шәрә аяғын тырнап алды.* Т. Арслан. / Тейешенсә кейенмәгән, тейешле кейеме булмаған. *Шәрә булыу. Шәрә ҡалыу.*

**2.** Үҫентеһе булмаған, бер ни менән ҡапланмаған; яланғас. *Шәрә баш.* ■ *Ғүмәр ағай .. түбәтәйҙе алып, тиҙ генә Әхмәтшаның шәрә түбәһенә ҡаплай.* Р. Ғабдрахманов. / Үҫемлеге булмаған, яланғас. *Шәрә тау.* ■ *Ҡурай тауышы яр-яңаҡтарға, шәрә ҡаяларға бәрелеп-һуғылып тауҙар артына, йылға үҙәненә тарала.* Т. Килмөхәмәтов. / Япрағы ҡойолған; япраҡһыҙ. *Шәрә ағас. Шәрә ҡалыу.* ■ *Шулай шәрә ҡалған урман; буш ҡыр урай яҡ-яғын; тамырҙарын туңдырмаҫҡа юрған иткән япрағын.* Ҡ. Даян. / *күсм.* Тейешле йыһазы булмаған. *Шәрә өй. Шәрә стена.*

**3.** *күсм.* Мәғәнәле эстәлеге булмаған; буш. *Шәрә информациянан торған очерк.*

**ШӘРӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* Шәрә булып ҡалыу; шәрәгә әйләнеү. *Шәрәләнгән ағас. Шәрәләнгән урман.* ■ *Йәй буйына йәп-йәшел ултырған ағастар, япраҡтарын ҡойоп шәрәләнеп ҡалғандар.* М. Садыҡова.

**ШӘРӘМӘТ** *и. диал.* Кемде йәки нимәнелер түбәнһетеп, мыҫҡыллап әйткәндә ҡулланыла; йорат. *Ағас шәрәмәте. Ир шәрәмәте.* ■ *Кәпәс ташлап бәхәскә сығар инем, кешеләрҙән генә оят. Ни тиһәң дә теге ерән мыйыҡ ҡоҙа шәрәмәте бит.* М. Кәрим.

**ШӘРӘФ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* **1.** Ҡәҙер, хөрмәт. *Батша йылан атланыуҙы шәрәф белде, хуш күреп, ул йыланды шунда уҡ менде.* М. Ғафури. / Абруй, дәрәжә. *Үҙ шәрәфеңде һаҡлау.*

**2.** *бәйл. функцияһында* **шәрәфенә** Хаҡына, хөрмәтенә. *Съезд шәрәфенә. Байрам шәрәфенә.* ■ *Уны [кенәзде] оҙатыу шәрәфенә ҙур бер бал-маскарад яһала.* И. Насыри.

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ШӘРӘФЛЕ** *с. иҫк.* Хөрмәтле; шәриф. *Шәрәфле кеше. Шәрәфле булыу.*

**ШӘРӘФӘТ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **шәрәф** 1. *Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк, .. илтифат ит, уҡыуҙалыр шәрәфәттәр.* Аҡмулла.

**ШӘРӘФӘТЛЕ** *с. иҫк.* Хөрмәтле; шәриф.

**ШӘТ** [*фарс.*] *мөн. диал.* Моғайын, бәлки. *[Ҡалала] шәт йөҙ сиркәү .. барҙыр.* М. Ғафури. *Иртәрәк юлланһаҡ төшкә барып та етербеҙ шәт* (Әкиәттән).

**ШӘТТА** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Төрлө, төрлө-төрлө. *Ҡыпсаҡ таифәһенең сәләмәт ҡалғандары әтрафи шәттарға таралған.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ШӘТТӘ** *мөн. ҡар.* **шәт.** *Ирәндекәй, бар ғәм онотола, күҙ ташлаһам әгәр һыныңа. Шәттә кинәнмәгән әҙәм юҡтыр сылтырап аҡҡан зәм-зәм һыуыңа.* А. Игебаев.

**ШӘҮЕҠ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ынтылыш, теләк. *Донъя инсандарҙы аҫрай һәм дә шөһрәт, шан бирә; үҫтерә шәүекъын, дәрәжә, ҙур талант һәм дан бирә.* С. Ҡудаш.

**ШӘҮЕҠЛЕ** *с. иҫк. кит.* Теләк менән янған; дәртле. *Һөйә һәм һөйөлә лә ул шәүекле, иләҫ күңел.* С. Ҡудаш.

**ШӘҮКӘЛӘЙ** *и. диал.* Бәйләнгән балалар башлығы.

**ШӘҮКӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Көс-ҡеүәт, бөйөклөк. *Уның абруйы, шәүкәте артты.*

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ШӘҮКӘТЛЕ** *с. иҫк. кит.* Көслө, ҡеүәтле; бөйөк. *Шәүкәтле Ватан. Шәүкәтле ил. Шәүкәтле халыҡ.*

**ШӘҮЛЕГӘН** *и. диал.* Үтәбикә. *Шәүлегән ояһы.*

**ШӘҮЛӘ** *и.* **1.** Ниндәй ҙә булһа яҡты нәмәнән ҡараңғы урынға төшкән яҡтылыҡ. *Ут шәүләһе. Лампа шәүләһе. Тәҙрәнән төшкән шәүлә.* / Яҡты нәмәнән күк йөҙөнә төшкән яҡтылыҡ. *Кис менән тағы артта яндырылған ауылдарҙың ут шәүләләре менән күк йөҙө ҡаплана.* Д. Юлтый. *Ҡара төндө яҡты итә прожектор шәүләһе* (Таҡмаҡтан). | *күсм.* Күңелһеҙ уй-кисерештең йөҙҙәге сағылышы. *Ҡыҙ .. моңлана башлаған. Элекке ҡояш кеүек яҡты йөҙгә ни эшләптер шәүлә ятҡан.* Ә. Вахитов. *Вәсиләнең йөҙөнә ҡара шәүлә һарылған. Ул уйсан. Ул ҡайғылы.* Ф. Әсәнов.

**2.** Ниҙеңдер алыҫта кәүҙәләнгән, ҡараңғыла күренгән һыны; силуэт. *Сеү, шәүләләр... Ҡарағаймы? Бәлки, кешелер.* Ғ. Сәләм. *Ҡуйы һоро тәмәке төтөнө аша булмәнең арьяғындағы ултырған кешеләр шыйыҡ шәүлә булып ҡына күренәләр.* Х. Мохтар.

**3.** Кеше йәки берәй нәмәнең ут, ҡояш яҡтыһынан төшкән һыны һүрәте; күләткә. *[Насип:] яратмайым үҙ шәүләләренән ҡурҡып йәшәүсе кешеләрҙе.* И. Абдуллин. / Шыма, йылтыр нәмә өҫтөндәге сағылған һын, һүрәт. *Көҙгөләге шәүлә.* ■ *Мин күҙәтеп айҙың шәүләһен ултырғанда Иҙел ярында, бала кеүек һиҙәм үҙемде бөйөк тәбиғәттең алдында.* М. Сөндөклө. *Шағирҙағы йөрәк серле китап, кемдәр әҙер уны тыңларға, Ҡуркмағыҙ, төндә күлгә ауған ай шәүләһен ҡушмаҫ тоторға.* Ғ. Хәйри. / *күсм.* Күҙ алдына килтереп кәүҙәләндерелгән һын; һүрәт. *Ире, ике улы, кейәүенең шәүләләре әбейҙең күҙ алдына килеп баҫты.* Н. Ҡәрип.

**4.** *күсм.* Кем йәки нимәгәлер хас сифат билдәһе; кем йәки нимәнеңдер асылына хас күренеш. *Үлем шәүләһе.* ■ *Ер хуры һин [Зөләйха],*

*йәки ожмах шәүләһе, һындарың гүйә фәрештә кәүҙәһе.* Салауат Юлаев.

**5.** *диал.* Күләткә.

♦ **Шәүлә кеүек** (*йәки* **һымаҡ**) *шул уҡ* **күләгә кеүек** (*кар.* **күләгә**).

● *Шәм төбөнә шәүлә төшмәҫ.* Мәҡәл.

**ШӘҮЛӘЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Тоноҡ һүрәт, шәүлә булып күренеү. *Ҡараңғыла шәүләләнгән өйҙәр.* / *диал. күсм.* Томанланыу (күҙгә ҡарата). *Күҙ шәүләләнеп тик тора.*

**2.** Кем йәки нәмәнең һыны хасил булыу, күҙ алдына килеү. *Заятүләк күҙҙәрен йома, шул ваҡыт уға Һыуһылыу шәүләләнеп калғандай була.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ШӘҮҮӘЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Ай календарының унынсы айы (*кар.* **календарь**). *Шәүүәл айы.*

**ШӘҮӘЛЕ** *и. диал.* Үтәбикә. *Шәүәле оаһы.*

**ШӘФҠӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Йәлләү, аяу хисе; мәрхәмәт. *Шәфҡәт хисе. Шәфҡәт күрһәтеү. Шәфҡәт көтөү.* ■ *Ҡыҙҙың күҙҙәре мине йәлләгән, миңә шәфҡәт менән ҡараған кеүек күренде.* Н. Ҡәрип. *[Фатима — старостаға:] Ярлыларҙы иҙҙең... Шәфҡәтең булманы. Нәләт бөтәгеҙгә лә.* А. Карнай.

**2.** Кемгәләр ҡарата булған яҡшылыҡ, рәхимлек. *Шәфҡәтен хурлап әсәндең, йөҙөн йыртып екермә һин. Ни әйтерһең, үҙ балаңа бер көн шулай екерһә? — тим.* С. Ҡудаш. *[Хан] һеҙ колдарым түгел, улдарым.. Шәфҡәтем күп һеҙҙең өлөшкә, күмермен шау алтын-көмөшкә.* М. Кәрим.

□ **Шәфҡәт итеү** (*йәки* **ҡылыу, күрһәтеү**) йәлләп, яҡшылыҡ күрһәтеү; мәрхәмәт итеү. *[Етем:] Шәфҡәт күрһәт, ҡыҙған, бабай!.. Туңам, индер йылы торлаҡҡа!* Ғ. Амантай.

♦ **Шәфҡәт туташы** (*йәки* **ҡыҙы**) медсестра. *Елдән етеҙ ошо шәфҡәт ҡыҙы мине һушһыҙ ятҡан еремдә — киң дала ҡар эсенән табып, алып ҡалған яуыз үлемдән.* Ғ. Байбурин. **Шәфҡәт фәрештәһе** дини ҡараш буйынса, кешене бәлә-ҡазанан һаҡлай торған фәрештә. *Бына теге шәфҡәт фәрештәһе .. һуғышта баһадирҙарҙы һаҡлап алып ҡала, ти. Пулянан да, ҡылыстан да...* З. Биишева.

● *Кесегә шәфҡәт ит, ҙурҙамангa хөрмәт ит.* Әйтем.

**ШӘФҠӘТЛЕ** *с.* Ҡыҙғаныусан, аяусан; мәрхәмәтле, яҡшы күңелле. *Шәфҡәтле кеше.* ■ *Һин — минең ғүмер, ялҡынлы теләк, шәфҡәтле әсә һәм туҙмаҫ йөрәк.* М. Хәй. / *күсм.* Нимәнелер мул итеп, күпләп биргән, йомарт. ■ *Күскенсе башҡорттарға был урын, Таналыҡ буйы, мөләйем күренгән, котло һәм шәфҡәтле төбәк булырға оҡшаған.* Ҡ. Аралбаев.

**ШӘФҠӘТЛӘНЕҮ** *ҡ.* Мәрхәмәтле, шәфҡәтле булыу. *Исламдың .. йөҙө асылды, күҙ ҡараштары шәфҡәтләнде.* З. Ғәлимов.

**ШӘФҠӘТСЕ** *и.* Ярҙам иткән; мәрхәмәт күрһәткән кеше. *Яңғыҙ янам, яңғыҙ көйәм тормошом усағында, юҡ ярҙамсым, юҡ шәфҡәтсем хәсрәтле сағымда* (Халыҡ йырынан).

**ШӘФҠӘТСЕЛ** *с.* Ярҙам итергә әҙер торған; мәрхәмәтле, шәфҡәтле. *Шәфҡәтсел кеше. Шәфҡәтсел булыу.*

**ШӘФҠӘТҺЕҘ** *с.* Йәлләй, ҡыҙғана белмәгән ҡаты бәғерле; мәрхәмәтһеҙ, рәхимһеҙ. *Рәхимһеҙ, шәфҡәтһеҙ Ҡарагөлөмбәт ҡыпсаҡтарҙың ырыуын бөтөрә, ти.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ШӘФҠӘТҺЕҘЛЕК** *и.* Шәфҡәтһеҙ булыу сифаты.

**ШӘФӘҒӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Яҡлап, аралап алған хәл; ауыр ваҡыттағы ярҙам. *Шәфәғәт һорау.*

□ **Шәфәғәт ҡылыу** ҡанат аҫтына алыу; яҡлау, ҡурсалау.

♦ **Шәфәғәт я рәсуле алла** *дини* хоҙай илсеһе, үҙең һаҡла, тигәндә әйтелә. *Әсир булды мин, балағыҙ доғалар ҡылып ҡарағыҙ, тәҡдиргә ниҙер сарабыҙ, шәфәғәт я рәсуле алла* (Бәйеттән).

**ШӘФӘҠ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Байып йәки сығып килгән ҡояштан күк йөҙөнә төшкән ҡыҙыллыҡ; шаңдаҡ. *Шәфәҡ нуры. Киске шәфәҡ, Иртәнге шәфәҡ. Шәфәҡ ҡалҡыу.* ■ *[Ауылға] еткәндә, көн кисәүләү генә түгел, шәфәҡ батыуға ла күп ҡалмаған ине.* Т. Йәнәби. *Көнбайышта әле шәфәҡ нуры, көнсығышта инде таң ата.* Ш. Бикҡол. / *күсм.* Ошо ҡыҙыллыҡҡа оҡшаш төҫ. *Көмөш сулпыларын сыңлатып, ике һылыу төштө һыу буйына йөҙҙәренә шәфәҡ уйнатып.* Р. Шәкүров.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ШӘХЕС** [*ғәр.*] *и.* **1.** Йәмғиәттәге айырым бер кеше. *Шәхестең тарихтағы роле.* ■ *Талап итә һеҙҙән кешелек, шәхес азатлығын танығыҙ.* М. Сөндөклө. *Ғәҙелһеҙлеккә ҡоролған иҫке донъяла шәхестең бер генә лә хоҡуғы юҡ.* Ғ. Рамазанов.

**2.** Айырым сифаттары, үҙенсәлеге, тотҡан урыны, эше менән билдәләнгән кеше. *Легендар шәхес. Тарихи шәхес.* ■ *Тыуған йылың ҡайһы? Һорауына — Халҡым тыуған йыл — тигән ҡыйыу яуапты донъяла, тарихта һәм тормошта үҙ урынын аңлаған шәхес кенә әйтә алыр ул.* Ә. Вахитов.

**3.** Әҙәбиәт һәм сәнғәттә ижад ителгән типик кеше һүрәте; образ.

**ШӘХСИ** *с.* **1.** Билдәле бер шәхескә ҡараған. *Шәхси милек. Шәхси архив. Шәхси китапхана.* / Билдәле бер шәхесте хеҙмәтләндергән. *Шәхси секретарь.*

**2.** Айырым бер шәхескә ҡағылышлы, шәхескә мөнәсәбәтле. *Шәхси тормош. Шәхси фекер. Шәхси беренселек.*

♦ **Шәхси состав** *кар.* **состав** 3.

**ШӘХСИӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Билдәле үҙенсәлектәре менән башҡаларҙан айырылып торған шәхес. *Ҡатын-ҡыҙ шәхсиәте.* ■ *Председатель .. докладсыға шәхсиәткә ҡағылмаҫҡа кушкан булды.* И. Насыри.

**2.** Үҙ мәнфәғәтен өҫтөн ҡуйған, үҙен генә ҡайғыртҡан хәл. *Ғафури [Туҡайҙы] шәхсиәттән өҫтөн торған бөйөк тәбиғәтле бер кеше тип тапты.* С. Ҡудаш.

**ШӘХСӘН** [*ғәр.*] *р. иҫк.* Шәхестең үҙе менән. *Шәхсән һөйләшеү.* ■ *Ғафури менән шәхсән танышып, серләшеп, ҡайғы һәм шатлыҡтарҙы уртаҡлашып китмәксе булам.* «Әҙәби Башҡортостан», 1951, № 11.

**ШӘҺАҘӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Нимәнеңдер дөрөҫлөгөн иҫбатлаған дәлил, таныҡлыҡ. *Шәһаҙәт биреү.* ■ *Һүҙҙәрҙең дөрөҫлөгөнә шәһаҙәт эҙләп.*

*[Курмеев] Сибай ағайҙың йөҙөнә караны.* И. Насыри.

**ШӘҺАҘӘТНАМӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Нимәнелер раҫлап яҙған яҙыу, дәлил булған ҡағыҙ; таныҡма. *Шәһаҙәтнамә алыу. Шәһаҙәтнамә биреү.* ■ *Ул [Ғариф] улдары алған «афарин», «бәхсин» шәһаҙәтнамәләрен быялалатып, стенаның иң күренекле урындарына аҫып ҡуя.* Ғ. Хәйри.

**ШӘҺИТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Изге эш өсөн ҡорбан булған кеше. *Шаһит булыу. // Шәһит кеше. Шәһит йән.* ■ *Инде мынау форсат ваҡыт килгәс, башҡорт халҡы йоҡлап ятһынмы? Иле өсөн һуғышып шәһит булған олатайҙар исемен һатһынмы?* Ш. Бабич.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

♦ **Ҡанлы шәһит** яуҙа үлгән, ҡорбан булған кеше. **Шәһиттәр ҡәбере** *ҡар.* **ҡәбер. Шәһит үлеү** (*йәки* **китеү**) изге эш өсөн үлеү; ҡорбан булыу. *Яҡшы атаның балаһы шәһит үлә, яу йөрөп.* Салауат Юлаев.

**ШӘҺҮӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Енси теләк, дәрт.

**2.** *диал.* Ирҙәр орлоғо.

● *Баланы үбеү — рәхмәт, ҡатынды үбеү — шәһүәт.* Мәҡәл.

**ШӘҺӘР** [*фарс.*] *и.* **1.** Промышленность һәм культура үҙәге булып, күп халыҡ йәшәгән урын; ҡала. *Ҙур шәһәр. Яңы шәһәр. Шәһәр урамы. Шәһәр халҡы.* ■ *Ауылыма ҡайттым шәһәрҙән, эште ташлап, яҙ менән.* Ш. Бабич.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

♦ **Шәһәрен бөрөү** *диал.* ҡыҫмаҡҡа алыу. *Ҡыҙҙыра бит тегене [Кәрим ағай]! Шәһәрен бөрөп алып бара. Шулай ҙа Сәлим дә бик тиҙ бирешә торғандарҙан түгел икән, суҡынған, сатнатып тора.* И. Ғиззәтуллин.

**ШӘШЕ** *и. диал.* Шәлше.

**ШӘШКЕ** [1] *и.* **1.** (*йәки* **ҡара шәшке**) Һыҫарҙар ғаиләһенә ҡараған затлы тиреле йылтыр ҡөрән йөнлө, ҡыҫҡа аяҡлы йыртҡыс йәнлек (һыу буйында, өңдә йәшәй) *Америка шәшкеһе. Шәшке тиреһе.* ■ *Йәнкәй-йәнеш китте ай һунарға, Ашҡаҙарҡай буйына шәшкегә* (Халыҡ йырынан).

**2.** *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Шәшке бүрек. Шәшке тун. Шәшке яға.*

♦ **Ҡыҙыл шәшке** һыҫарҙар ғаиләһенә ҡараған ерән йөнлө, аҡ иренле йыртҡыс йәнлек (тамыр төптөрендә, таш араһында йәшәй); ҡыҙамыҡ. **Һары** шәшке *диал.* ҡыҙыл шәшке.

**ШӘШКЕ** [2] [*рус.* чашка] *и. диал.* Сынаяҡ. *Шәшке өҫтө. Бер шәшке сәй.* ■ *Бисәләр, тәүҙә бер-береһенән тартынған һымаҡ бәләкәс кенә тешләп ашаһалар ҙа, берәр шәшке сәй эскәндән һуң, ирәбеләләнеп киттеләр.* Ғ. Дәүләтшин.

**ШӘШКЕ** [3] [*рус.* шашка] *и. һөйл.* Ҡылыс. *Ҡулда ғына мылтыҡ, билдә шәшке, өҙөлөп-өҙөлөп бара билгенәм* (Бәйеттән).

**ШӘЪАН** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Әһәмиәт.

**2.** Кемделер айырып торған сифат; үҙенсәлек. *Ҡарышып, тиҫкәреләнеп, яҡкауланып эшкә, хеҙмәткә өйрәнеп булмай. Был комсомол шәъанына муафиҡ түгел.* С. Агиш.

# Щ

**ЩЁТКА** [*рус.*] *и.* Ниҙер таҙартыу, һеперeү өсөн бәләкәй таҡтаға шырт ҡыл ултыртып яһаған нәмә. *Аяҡ щёткаһы. Кейем щёткаһы. Теш щёткаһы. Иҙән щёткаһы.*

**ЩЁТКАЛАУ** *ҡ.* Щётка менән таҙалау. *Аяҡ кейемен щёткалау. Өҫ кейемен щёткалау.*

**ЩИ** [*рус.*] *и.* Кәбеҫтәнән, ҡуҙғалаҡтан, шпинаттан һ. б. бешерелгән аш.

# Ы

**Ы** Башҡорт алфавитының утыҙ етенсе хәрефе.

**ЫБЫР-СЫБЫР** *с.* Әһәмиәте бәләкәй булған, ваҡ-төйәк, ваҡ (күп һанлы кеше йәки нәмәләргә ҡарата). *Ыбыр-сыбыр бала. Ыбыр-сыбыр халыҡ. Ыбыр-сыбыр эш. // Еләктең йыйып ыбыр-сыбыры ҡалған.* ■ *Уның [Ғәлимдең] йыйған еләктәре эре, ҡыҙыл, минең түйыҙҙа — ыбыр-сыбыр еләктәр.* Ю. Әхмәҙиев.

**ЫҒЫ-ЗЫҒЫ** *и.* **1.** Сыр-сыулы тәртипһеҙ хәрәкәт, талаш-тартыш, буталыш. *Ығы-зығы китте. Ығы-зығы килеү.* ■ *Был ығы-зығы, тәртипһеҙ тауыш эсендә мин, ни эшләргә, ҡайҙа барырға белмәй.., аптырап ҡалдым.* Ғ. Ғүмәр. *Ауыл инде күптән уянған, урамдар ығы-зығы менән тулған.* Ф. Рәхимғолова. *Киткән тартыш, шау-шыу, ҡупкан ығы-зығы.* М. Тажи.

**2.** Төрлө шау-шыу, хәрәкәттән торған мәшәҡәтле эш. *Өмә ығы-зығыһы.* ■ *Бөтә көн шахта баҫҡандарҙы күмеү ығы-зығыһы менән үтте.* Т. Хәйбуллин. *Ваҡ мәшәҡәт, ығы-зығы тамам, бар эшемдең сыҡтым осона.* М. Кәрим.

♦ **Ығы-зығы килеү** сыр-сыу килеп буталышыу; зыҡ ҡубыу. *Баҙар ығы-зығы килә.* ■ *Яҙ еткәс, ығы-зығы килеп, ыҙманан йәйләүгә күсәләр* (Әкиәттән).

**ЫҒЫ-ЗЫҒЫЛАНЫУ** *ҡ.* Тауышланыу, тынысһыҙланыу; ығы-зығы килеү. *Байҙар төркөмө ығы-зығылана.* Ә. Вәхитов.

**ЫҒЫ-ЗЫҒЫЛЫ** *с.* Сыр-сыулы, буталышлы. *Ығы-зығылы тормош.* ■ *Ығы-зығылы ҡала вокзалында улар бер-береһен тиҙ күҙҙән юғалттылар.* М. Кәримов.

**ЫҒЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** Бер яҡҡа ауышыу, ятыу, ығыу. *Ашлыҡ ергә ығылған.*

**2.** *күсм.* Үҙ итеп һыйыныу; ылығыу. *Ығылғандың йөҙө ағарған, ҡалғандың йөҙө ҡаралған.* М. Буранғолов.

**ЫҒЫР** *с.* **1.** *һөйл.* Ауыр эштән нyҡ ҡаҡшаған; йонсоу. *Ығыр ат. Ығыр булыу.*

**2.** *диал.* Ығыш.

**ЫҒЫРМАУ** *и. диал.* Үңербау.

**ЫҒЫР-ШЫҒЫР** *оҡш.* **1.** Ауыр, яй әйләнгән тәгәрмәс тауышын белдергән һүҙ. *Ығыр-шығыр килеү.*

**2.** *р. мәғ. күсм.* Көс-хәл, ҡыуырлыҡ менән, әкренләп. *Ығыр-шығыр донъя көтөү.*

**ЫҒЫУ**[1] (ыкғ) *к.* **1.** Бер яҡҡа ауышыу; ҡыйшайыу. *Кәбән аҫҡа табан ыҡҡан.* ■ *[Гөлъямалдың] өйө иҫкереүе етеп, бер яҡҡа ыҡҡан. Тирәтеп ҡуйылған.* Б. Дим. *Ағас быҫҡы ҡуйған яҡҡа ыҡты ла, уны нык итеп ҡыҫты.* Н. Мусин. / Һығылып тотош бер яҡҡа ауыу (игенгә, үләнгә ҡарата). *Ыҡҡан арыш.*

**2.** Ел ыңғайына, һарҡыу түбәненә хәрәкәт итеү. *Көтөү буран менән ығып барҙы.* ■ *Төтөн ел ыңғайына ығып, туғайға таралды.* М. Тажи.

**ЫҒЫУ**[2] (ыкғ) *к. диал. кар.* **ығышыу**[2]. *Ығып ҡына атлау.*

**ЫҒЫШ** *с.* Ҡабаланмай, яй ҡуҙғалыусан; әкрен хәрәкәтле; мыштыр, быҙмыр. *Ығыш кеше.* // *Ығыш ҡыланыу.*

**ЫҒЫШЛАУ** *к. һөйл.* Ҡабаланмай, яй ҡуҙғалыу; мыштырлау. *Ығышлап ҡына эшләү.*

**ЫҒЫШТЫРЫУ**[1] *к.* Бер яҡҡа ауыштырыу. *[Ауылдың] көрт һырып ығыштырған ситәндәренә тиклем миҙә яҡын һымаҡ. Яратам ауылды.* Б. Бикбай.

**ЫҒЫШТЫРЫУ**[2] *к.* Ҡабаландырмай, яй ғына хәрәкәт иттереү. *Атты ығыштырып ҡына барыу.*

**ЫҒЫШЫУ**[1] *к.* **1.** Бер яҡҡа ауышыу, ығыу. *Мөйөштәре ҡыйшайып, ығышып бөткән.. ташландыҡ балаған күренде.* Я. Хамматов. / Тотош бер яҡҡа ауыу, ығыу (игенгә, үләнгә ҡарата). *Совхоз баҫыуҙары ..игендәре ығышып ултыра.* Б. Бикбай.

**2.** Ел ыңғайына, һарҡыу түбәненә хәрәкәт итеү; ығыу. *[Күл уртаһындағы утрауҙа] бер ҡайын үҫеп ултыра ине.. Ул утрау шул ҡайын менән бер яҡтан икенсе яҡҡа ығышыр, күсеп йөрөр ине. Шуға уны Ығышмаҡул тиҙәр* (Легенданан).

**3.** *диал. кар.* **ылығыу** 1.

**ЫҒЫШЫУ**[2] *к.* Ҡабаланмай, яй ҡуҙғалыу. *Ығышып ҡына атлап, эңерләтеп ауылға ҡайтып еттек.* Н. Мусин.

**ЫҘА** *и.* Эш-тормоштағы төрлө ауырлыҡ; яфа. *Ыҙа күреү.* ■ *Ата менән әсә ыҙа сиккән күрмәйенсә тормош яҡтыһын.* С. Кулибай. / Берәй эш-хәлгә бәйле мәшәҡәт, ҡыйынлыҡ. *Кешегә ыҙа булыу.* ■ *Йәшәү һәйбәт һыйыр менән генә, күп булһа ла уның ыҙаһы.* Ғ. Дәүләтов.

**ЫҘАЛАНДЫРЫУ** *к. кар.* **ыҙалатыу.**

**ЫҘАЛАНЫУ** *к.* Ыҙа, яфа кисереү; яфаланыу, интегеү. *Теш һыҙлап ыҙаланыу. Ыҙаланып йәшәү.* ■ *Муйылбикә лә шатлыҡ күрмәй, ыҙаланып барып донъянан китә.* М. Минһажетдинов. / Берәй эште башҡара, хәл итә алмай аптырау; йөҙәү. *Ғәндәлиф карт ошо һорауға яуап таба алмай ыҙаланып йөрөгән.* Т. Килмөхәмәтов.

**ЫҘАЛАТЫУ** *к.* Ыҙаға, яфаға дусар итеү; яфалау, интектереү; ыҙаландырыу. *Ыҙалатып бөтөрөү.* ■ *[Григорьев:] Танымаҫһың шул. Нык ыҙалаттылар мине, дуҫҡай.* Я. Хамматов. *[Хафиз карт:] Ғәйепһеҙ булғас, кешене ниңә төктомалға ыҙалатып йөрөтәләр һуң?* М. Тажи. / Тынғы бирмәй аптыратыу; йөҙәтеү. *Аҡса һорап ыҙалатыу. Ашарға көсләп ыҙалатыу.*

**ЫҘАЛАУ** *к.* **1.** Ыҙа сиктереү, яфалап интектереү: ыҙалатыу. *Этте ирештереп ыҙалау.* ■ *[Шағир] нисәмә йылдар йән ыҙалап, ер боҙоп килгән ағас һуканы.. ләғнәтләп сығарып ташлауҙы һүрәтләй.* Ғ. Хөсәйенов. / Тынғы бирмәй аптыратыу; ыҙалатыу, йөҙәтеү. *Ул [Алукин] төрлө һорауҙар менән ыҙалап, уҡыусыларҙың теңкәһенә тейә.* Х. Мохтар.

**2.** *диал.* Ыҙаланыу. *Баш өйәнәге менән ыҙалай.*

**ЫҘАЛЫ** *с.* Ыҙа менән бәйле; яфалы, интектергес. *Ыҙалы тормош. Ыҙалы эш. Ыҙалы юл. Ыҙалы булыу.*

**ЫҘАЛЫҠ** *и. кар.* **ыҙа.** *[Сөләймән] үҙе лә ыҙалыҡ менән үҫте.* Я. Хамматов. *Яралы халыҡ әҙме ҡорбан бирҙе, әҙме күрҙе аҙап, ыҙалыҡ.* Х. Ғәбитов.

**ЫҘАН** *м.* **1.** Ерҙе, баҫыуҙы бүлгән сик. *Ыҙан һалыу. Ыҙан ярыу. Ыҙанды бөтөрөү.* ■ *Яланда ыҙан буйындағы дегәнәктәр генә һерәйеп ултырып ҡалған.* Ж. Кейекбаев. / Сик менән бүленгән баҫыу ере. *[Ғәйни:] Ана шул ҡыуаҡтың был яғынан ике ыҙан бире аҡһыл булып күренгән беҙҙең бойҙай булыр ул, бисәкәй.* Т. Йәнәби. *[Шакир] оло юл буйлап үҙ ыҙанына ҡарай ала атты аҡрын ғына аяңлатып китте.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм. һир.* Билдәле бер йола, ғөрөф-ғәҙәт тәртибе. *[Ҡаныш:] Берүк боҙолошмағыҙ, татыулыҡ менән башҡарығыҙ изге эштең изге ыҙанын.* Х. Ғәбитов.

**ЫҘАНДАШ** *с.* Ыҙандары күрше, сиктәш булған. *Ыҙандаш колхоздар. Ыҙандаш булыу.* // *[Нәкиә — Ғатауллаға:] Һеҙҙекенә ыҙандаш сәскәйнек.. Хәҙер айырырлыҡ та түгел, ике арыш бергә ҡушылып үҫкән.* Й. Солтанов.

**ЫҘАН-ЙОЛА** *и. йыйн.* Төрлө ғөрөф-ғәҙәт, йолалар тәртибе. *Ыҙан-йоланы тотоу.* ■ *Сәлим өсөн ундағы уйындар, ыҙан-йолалар бөтәһе лә ят булыу сәбәпле, ул уйынға ҡатнашманы.* И. Насыри.— *Ҡустым, ҡаҙаҡ араһына барыу ғына етмәй, хәтерлә. Уларҙың ыҙан-йолаларын белмәһәң — хәтәр.* Т. Йәнәби.

**ЫҘАНЛАУ** *к.* Ерҙе ыҙан менән бүлеү; ыҙан ярыу. *Ыҙанлап ҡуйыу.*

**ЫЗБА** [*рус.* изба] *и. диал. кар.* **өй** 1.

**ЫҘҒАР** *и.* **1.** Бик ҡаты, әсе һыуыҡ. *Ҡышҡы ыҙғар.* // *Ыҙғар ел.* ■ *Ыҙғар сәсеп торған һыуыҡ ҡыштар үтеп, көләс йөҙлө яҙ килер.* Х. Ғәбитов. *Берҙән-бер көн гинуар ыҙғарында бабай сирләп аяҡтан йығылған* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Әсе михнәт, ғазап. *Тормош ыҙғары. Һуғыш ыҙғары.* ■ *Иҫке көндөң беҙ ыҙғарын күреп, уҡый алмай наҙан үҫкәнбеҙ.* Т. Йәнәби.

**3.** *һөйл.* Киҙеү ауырыуы.

**4.** *диал.* Ауырыуҙың ҡалдығы. *Һыуыҡ тейгәндең ыҙғары.*

**ЫҘҒАРЛАУ** *к. һөйл.* Ауырыҡһыныу, сырхау.

**ЫҘҒАРЛЫ** *с.* Әсе һыуыҡ булған. *Ыҙғарлы көн.* / *күсм.* Михнәтле, ғазаплы. *Ыҙғарлы йылдар.*

**ЫҘҒЫР** *с.* Үҙәккә үтерлек әсе, бик ҡаты. *Ыҙғыр буран. Ыҙғыр һыуыҡ.* ■ *Ҡарағай ғына ағас, йәмле ағас, ыҙғыр елдәргә лә бирешмәй* (Халыҡ йырынан).

**ЫҘҒАРЫҠ** *с. кар.* **ыҙғыр.** *Ыҙғырыҡ елле, ҡара төнлө көҙ килде.* **И.** Көсәпҡол.

**ЫҘҒЫТЫУ** *к. диал.* Ҡуҙғытыу.

**ЫҘҒЫШ** *и.* Кешеләр араһындағы янъял; талаш. *Ыҙғыш күтәреү. Ыҙғыш сығарыу.* ■ *Аҫабалыҡ өсөн булған был ыҙғыш тора-бара асыҡ дошманлыҡҡа илтеп еткергән.* Б. Бикбай.

**ЫҘҒЫШЛЫ** *с.* Янъял сыҡҡан, талашлы. *Ыҙғышлы мәсьәлә.*

● *Ыҙғышлы өйгә ут төшөр.* Мәҡәл.

**ЫҘҒЫШТЫРЫУ** *к.* Үҙ-ара әрләштереү, талаштырыу. *Ыҙғыштырып бөтөү.* ■ *Уның [Абдулланың] эше — кешегә яла ягыу, нахаҡтан кеше рәнйетеү, береһен икенсеһенә яманлап, кеше ыҙғыштырыу.* Я. Хамматов.

**ЫҘҒЫШЫУ** *к.* Үҙ-ара асыуланышып, ныҡ әйтешеү; талашыу. *Ыҙғышып китеү. Юҡтан ыҙғышыу.* ■ *Юлай.. ыҙғышырға көн дә бер янъял ҡарай.* Ш. Бабич. *Татыу ғына йәшәмәнек бугай, ыҙғышҡан да саҡтар күп булды.* Ә. Атнабаев.

● *Күршем менән ыҙғышһам, өйгә инермен; өйөм менән ыҙғышһам, ҡайҙа инермен?* Мәҡәл.

**ЫҘМА** [*рус.* изба] *и.* **1.** Ҡыш тора торған урын; ҡышлау. *Бесән, ураҡ ваҡыты үтте, беҙ йәйләүҙән ыҙмаға ҡайттыҡ.* С. Кулибай.

**2.** *диал. ҡар.* **өй** 1. *Тауыҡ кетәге кеүек ыҙмалар нигеҙенән һүтеп ташланған.* М. Ғафури.

**ЫҘЫР-МЫҘЫР** *и. һөйл.* Өҙөп әйтә алмай, икеләнеп, тотлоғоп торған хәл. *Ғәлләмде артыҡ һөйләтмәй, ыҙыр-мыҙырына ҡуймай, бер ауыҙҙан тигәндәй һайлап ҡуйҙылар.* Һ. Дәүләтшина.

**ЫҘЫС** *и. диал.* Һәр төрлө һауыт. *Көрпөлдәп ятҡан яңы көл, ..ел көслө булһа, аш-һыу тора торған ыҙыстарға тулып бөтә.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЫҘЫ-СЫУЫ: ыҙы-сыуы төшөү** *диал.* сыр-сыу килеп шаулашыу.

**ЫЖА** *и. иҫк.* Быҫҡы.

**ЫЖҒЫР** *с. ҡар.* **ыҙғыр.**

**ЫЖҒЫРТЫУ** *к.* Яман тауыш менән ҡысҡыртыу.

**ЫЖҒЫРЫУ** *к.* **1.** Үкергән, олоған һымаҡ, яман тауыш сығарыу. *Көҙгө зәһәр ел ..ауыл өйҙәренең ҡыйыҡтарына ташланып, мөрйәләренә инеп ыжғыра.* Б. Хәсән. *Снарядтар бер-бер артлы һауа ярып ыжғырып килә.* Ә. Байрамов.

**2.** *ҡар.* **ажғырыу** 1.

**ЫЖ-Ж** *окш.* Көслө ел иҫкәндә йәки берәй ҙур бөжәк осҡанда сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ. *Ыж-ж итеү. Ыж-ж килеү.*

**ЫЖЛАУ** *к. гәҙәттә юкл.* Нимәгәлер иғтибар итеп, уны иҫәпкә алып, уға үҙ мөнәсәбәтеңде белдереү. *Ыжлап та ҡарамау. Саҡ ҡына ла ыжламау.* ■ *Йәмгиҙең йәне көйә.. Фәрхиә быға ыжлап та бирмәй.* Х. Ғиләжев. *Әсгәт алып пистолетын, тынғыһыҙ ҡошҡа тоҫҡай. Атып-атып ҡараһа ла, ыжламай ҙа һайыҫҡан.* С. Кулибай.

**ЫЖЫҠА** *и. һөйл.* Гел мыжып, ыжып тора торған кеше; ағас игәү.

**ЫЖЫЛДАУ** *к.* Ыж-ж итеү, ыж-ж иткән тауыш сығарыу. *Буран һаман котора, буран ыжылдай.* А. Карнай. *Бер яҡта һағыҙаҡ һымаҡ ыжылдап Әхмәт йөрөй.* Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.

**ЫЖЫУ** *к.* Урынлы-урынһыҙға өҙлөкһөҙ өйрәтеү, киҫәтеү йәки шелтәләү. *Ыжып ҡына тороу. Ыжып теңкәгә тейеү.*

**ЫЗҒЫРЫУ** *к.* Ныҡ ауыртҡандан әрнеп, әсе тауыш менән ҡысҡырыу. *Ызғырып илау. Ызғырып ятыу.*

**ЫЗҒЫУ** *к. диал.* Ауырыҡһыныу.

**ЫЗМЫҠ** *и. диал.* Әүмәлә.

**ЫЗЫЛДАУ** *к.* Баҡырмай, һуҙып ҡына тауыш биреү (һыйырға ҡарата). *Кәртәлә ҡыҙыл һыйыр ызылдай.* Һ. Дәүләтшина.

**ЫЗЫЛДАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **ызылдау.** *Быҙауҙар ызылдашып ашарға көтәләр.*

**ЫЙҠАНЛАУ** *к. диал.* Ҡыйшанлау.

**ЫЙЫҠ** *и.* **1.** Аттың мундаһын, түшен ҡамыт, ыңғырсаҡ, эйәр һуҡҡандан боҙолоп, аҙған шешек. **Ыйыҡ булыу** 1) аттың боҙолоп эрене һарҡып тороу; 2) *күсм.* кем йәки нимәнәндер ныҡ йонсоу. *[Айбулат] Ғәзимәнең бурҫылдауынан да, Имайҙың екеренеүенән дә йонсоп, ыйыҡ булып бөткән.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *иҫк.* Яурын, иңбаш. *Көрпә тундар кейҙем, ыйығымда торманы* (Халыҡ йырынан).

**ЫЙЫҠЛАУ** *к.* **1.** Мундаһы, түше боҙолоп, ыйыҡ булыу (атҡа ҡарата). *Ыйыҡлаған ат.*

**2.** *күсм.* Маҙа бирмәй, ныҡ йонсотоу. *Ыйыҡлап йығыу.*

**ЫЙЫЛЫУ** *к. диал.* Ыйыҡлау, ыйыҡ булыу.

**ЫҠ** [1] *и.* **1.** Хәрәкәт йүнәлеше; ыңғай. *Ел ығына эйәлеү.* ■ *[Малдар] баштарын буран ығына һалып, юшап торалар.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Кемдеңдер яйы, ыңғайы. *Кеше ығына йөрөү.* **Ыҡҡа килеү** кемдеңдер ихтыярына ыңғайлау; ыңғайға килеү. *Ыҡҡа килмәй күп тартҡылашһам да, Ҡасимов ҡуйманы, күндерҙе.* В. Нафиков. **Ыҡҡа килтереү** кемделер үҙ теләгеңә, ихтыярыңа буйһондороу. *Күсемде йайлап ыҡҡа килтерҙе, үҙенә ауҙарҙы Айҙар.* Ғ. Хөсәйенов.

**ЫҠ** [2] *и.* Ел һуҡмаған урын; ышыҡ. *Ыҡта тороу. Малды ыҡҡа ҡуйыу.*

**ЫҠЛАНЫУ** [1] *к. төш. ҡар.* **ыҡлау** [1]. *Елгә ыҡланып барыу.* ■ *[Байгилде] Боғараға табан ыҡланып, ҡулын уның яуырынына һалды.* Ә. Хәкимов.

**ЫҠЛАНЫУ** [2] *к.* **1.** *төш. ҡар.* **ыҡлау** [2]. *Ыҡланып тороу.*

**2.** *һөйл.* Һыйыныу. *Кешегә ыҡланыу.*

**ЫҠЛАТЫУ** *к.* Бер яҡҡа йүнәлтеү; ыңғайлатыу. *[Ҡола айғыр] көтөүҙе бирмәй, ауыл ягына һөрә, ыҡлата башлай.* М. Буранғолов.

**ЫҠЛАУ** [1] *к.* **1.** Бер тарафҡа йүнәлеш алыу; ыңғайлау. *[Урал — Шүлгәнгә:] Атам һүҙен тотманың, яуызлыҡҡа ыҡланың.* «Урал батыр». *Егет бара торғас, ҡурай тауышы ишетеп, шаңлаған да шул яҡҡа табан ыҡлаған.* «Аҡбуҙат».

**2.** Ел, буран ыңғайына йүнәлеү (малға ҡарата). *[Кәләмбай] Ҡара һыуға ҡарай әйләп ҡараһа ла, буранға ыҡлаған мал уға баш бирмәй.* Т. Хәйбуллин.

**ЫҠЛАУ** [2] *к.* Ышыҡ урынға инеү; ышыҡланыу. *Ыҡлап тороу.* ■ *Ямантауҙың буйына бөтә йәнлек ыҡлаған.* «Караһаҡал».

**ЫҠЛАШЫУ** *к. ҡар.* **ығыу** [1]. *Аҙ-маҙ ғына танышлыҡтары булғандар ҙа бындай ауыр көндәрҙә Арыҫланға ыҡлашырға тырыштылар.* Ғ. Ибраһимов.

**ЫҠМАТЛЫ** *с. диал.* Ыҡсым.

**ЫҠ-МЫҠ:** **ыҡ-мыҡ итеү** ни әйтергә, нисек әйтергә белмәй буталып, тотлоғоу. *Ыҡ-мыҡ итеп тороу.* ■ *Шәхми был һүҙҙе ишеткәс, бөтөнләй каушап калды, ыҡ-мыҡ итте.* Т. Йәнәби. *[Әхмәҙулла] ыҡ-мыҡ итеп, һүҙен башлай алмай торҙо.* Р. Низамов.

**ЫҠСЫМ** *с.* Күләм-дәүмәле ҙур булмаған, йәтеш, йыйнаҡ. *Ыҡсым булмә. Ыҡсым кейем. Ыҡсым өҫтәл. Ыҡсым кәүҙә. Бәләкәй генә ыҡсым хужалыҡ. Ыҡсым булыу. // Ыҡсым кейенеү.* ■ *Ыҡсым ғына арбаға егелгән ат .. әкрен генә атлай.* К. Мәргән. *Урманлы ер булғанғалыр инде, йорттар йыйнаҡ, ыҡсым итеп ағастан һалынған.* Я. Вәлиев.

**ЫҠСЫМЛАНЫУ** *ҡ.* Ыҡсымға әйләнеү, ыҡсым булыу. *Һалдатса кейенгәс, былар ыҡсымланып, йәшәреп киткәндәй булдылар.* М. Ғафури.

**ЫҠСЫМЛАУ** *ҡ.* Ыҡсым итеү, ыҡсым төҫ биреү. *Ыҡсымлап өйөү.* ■ *[Һатыусы] нәмәләрҙе.. ыҡсымлап төрә башланы.* Б. Бикбай. / Ҡулайлы, йәтеш итеү. *Батырҙар, билбауҙарын ыҡсымлап тотоп, бер урында тороп түҙмәй, ары-бире йөрөйҙәр.* «Аҡбуҙат».

**ЫҠСЫМЛАШТЫРЫУ** *ҡ. кар.* **ыҡсымлау.**

**ЫҠСЫМЛЫҠ** *и.* Ыҡсым булған хәл. *Композицион ыҡсымлыҡ етешмәү.* ■ *Һалдат.. һалдат инде, йыйнаҡлыҡҡа, ыҡсымлыҡҡа өйрәнгән.* Р. Низамов.

**ЫҠТЫМАТ** *с. диал.* Ыҡсым.

**ЫҠТЫРЫУ** [1] *ҡ.* Ауыш хәлгә килтереү. *Ағасты ыҡтырыу.*

**ЫҠТЫРЫУ** [2] *ҡ. диал. кар.* **ығыштырыу** [2]. *Ярай, Сәлмән Ҡыҙыл һыуындай оҙон-оҙон уйҙар уйлап, үгеҙен ыҡтырып ҡайта торһон, беҙ уның белешенә киләйек* (Әкиәттән).

**ЫҠШАНЛАУ** *ҡ.* Кемгәлер оҡшарға тырышып ҡыланыу; ҡыйшанлау. *[Алмаҡай — Бикәгә:] Ыҡшанлап, кешене белмәй тороп, муйынына аҫылынып бармаҫ инең.* Ш. Насыров.

**ЫҠШЫМҺЫҘ** *с. диал.* Артыҡ йыуаш, йомшаҡ; мәмәй.

**ЫҠШЫНЫУ** *ҡ. диал.* Ышҡыныу.

**ЫҠШЫУ** *ҡ. диал.* Ышҡыу.

**ЫҠЫЛДАУ** *ҡ. диал.* Ыҡ-мыҡ итеү.

**ЫЛАЙ** *и.* Батҡыл урын; һаҙамыҡ, керәкә.

**ЫЛАҠ** *и.* **1.** Кәзә, ҡоралай бәрәсе. *Кәзәләр ылаҡтары менән кәртә өҫтөнә менеп, төкөшөп, шаярып йөрөйҙәр.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *диал.* Йәйләүес.

**3.** *(баш хәреф менән) астр.* Зодиактың береһе (Уҡсы менән Һыу ҡояр йондоҙлоҡтары уртаһында урынлашҡан).

**ЫЛАҠЛАУ** *ҡ.* Ылаҡ килтереү; бәрәсләү (кәзә, ҡоралайға ҡарата). *Ҡоралай һыуығы ҡоралай ылаҡлағанда була.* Һынамыш.

**ЫЛАҢ** *и. диал. кар.* **оран** 1, 2. *Ылаң һалыу.*

**ЫЛАҢҠЫ** *и. диал.* Ауырлыҡ, мәшәҡәт. *Кешегә ылаңҡыңды һалыу.*

**ЫЛАСЫН** *и.* **1.** Оҙон ҡыйғас ҡанатлы, үткер кәкре суҡышлы йыртҡыс ҡоштарҙың дөйөм исеме. *Аҡ ыласын. Күк ыласын. Ҡара ыласын.* ■ *Бейектә оса ҡоҙғон ҡош, унан бейек осор ыласын бар.* Салауат Юлаев. *Сөйөп ыласын, уҡ атып, беҙ йөрөйбөҙ һунарҙа.* Б. Бикбай. *Тирмә алдына ерән ат менгән, ..эйәре ҡашына ҡыҙыл ыласын ултыртҡан бер һыбайлы килеп туҡтай.* (Әкиәттән).

**2.** Батыр, ҡыйыу кешегә ҡарата әйтелә. *Егеттәр — ыласын, һылыу ҡыҙҙарым.* М. Хәй.

**ЫЛАУ** *и.* **1.** Йөк, кеше йөрөткән атлы арба йәки сана. *Ылау яллау.* ■ *Бер нисә урында ылау алыштырып, өсөнсө көн тигәндә кантон урынлашҡан ауылға килеп еттек.* С. Агиш. *Саналарына шығырлатып ауыр йөк тейәгән өс ылау урамға килеп инде.* Б. Бикбай.

**2.** Бергә йөк тейәп, юлға сыҡҡан күмәк ат йәки машина төркөмө. *Ылауҙа йөрөү.* ■ *Бөгөнгө көндә элеваторға ҡыҙыл ылау менән егерме биш йөк иген оҙатылды.* М. Тажи.

◆ **Ылау ҡыуыу** (*йәки* **сабыу**) ялланып йәки йөкләмә үтәп, ылау менән йөк ташыу. *Билал ағай былтырҙан бире ылау саба. Ул атының лерт-лерт юртыуына .. гәҙәтләнеп бөткән инде.* Ә. Вәли. *Һалым тигәне теңкәне ҡорота. Ылау ҡыуыу, линия хеҙмәте сей елкәгә тейә.* Ғ. Хөсәйенов.

**ЫЛАУЛАУ** *ҡ.* Ылауға тейәү, ылау менән йөрөтөү. *Игенде ылаулап ташыу.*

**ЫЛАУСЫ** *и.* Йөк тейәгән йәки кеше ултыртҡан егеүле ат менән юл йөрөүсе. *Арбалар өсәү. Өсәр кеше ултырған. Улар эргәһендә ике арбала ике ылаусы бар.* Б. Хәсән. / Йөк тейәп, күмәк ат йәки машина менән килгән юлсы. *Ауылдан силос тейәгән ылаусылар килде.* И. Ғиззәтуллин.

**ЫЛАШ** *и.* Башлы йәш ҡоротто теҙеп һалып киптереү өсөн йәш талдан үрелгән, дүрт ҡаҙыҡ өҫтөнә ҡуйылған ҡоролма. *[Әсәһе] ылашҡа төтөндә ыҫлап киптереү өсөн, ҡорот дүңгәләктәре теҙеп тора ине.* Ғ. Ибраһимов. / Бесән, көлтә кеүек нәмәләрҙе киптереү өсөн ерҙән күтәртеп яһалған ҡоролма. *Бесәнде ылашҡа һалыу. Көлтәне ылашҡа ҡуйыу.*

**ЫЛБЫРАТЫУ** *ҡ.* Тота алмаҫлыҡ хәлгә килтереү; иҙрәтеү. *Итте ылбыратҡансы ҡайнатыу.*

**ЫЛБЫРАУ** *ҡ.* Иҫкереп йәки йомшап, үҙенән-үҙе өҙөлөп, таралып тороу; иҙрәү. *Ылбырап бешкән ит.* ■ *Ылбырап бөткән етен костюмды кейеп булмай бит инде.* С. Кулибай.

**ЫЛҒЫЙ** *р.* **1.** Һәр ваҡыт, гел. *Ылғый бер һүҙ һөйләү.* ■ *Эш ваҡытында ылғый уйын ҡороу оҡшап етмәй.* М. Тажи.

**2.** *киҫ. мәғ.* Һан, состав яғынан сикләп килә; тик, гел генә. *Ылғый йәш мал.* ■ *Армияға ҡаҙаҡтарҙың ылғый ярлыһын ғына ебәргәндәр.* А. Таһиров. *Тауҙар түйҙыра башланы, ылғый тау ҙа тау.* И. Насыри.

**ЫЛДЫЙ** *и. диал. кар.* **һарҡыу** [2].

**ЫЛДЫМ** *с. кар.* **ындым.**

**ЫЛДЫМ-ЙЫЛДЫМ:** **ылдым-йылдым итеү** йәһәтләү, хәстәрләү.

● *Ылдым-йылдым итҡән ике түйыр, иң-һынын тарҡкан тик торор.* Мәҡәл.

**ЫЛЙЫРАТЫУ** *ҡ. кар.* **ылбыратыу.** *Ылйыратҡанса кейеү.*

**ЫЛЙЫРАУ** *ҡ.* Иҫкереп йәки йомшап, үҙенән-үҙе өҙөлөп, таралып торорлоҡ хәлгә килеү; иҙрәү. *Ылйырап бөткән күлдәк.*

**ЫЛҠА:** **ылҡаһын да ҡылдырмау** бик ныҡ туҙҙырыу, бөтөнләй эшлектән сығарыу. *[Ҡатын:]*

*Анау балалар ни шаршау менән уйнауҙан баш-ҡаны белмәйҙәр.., тапалап, ылҡаһын ҡалдырмай, бауҙарын өҙгөләп бөттөләр, ендәр.* Ғ. Дәүләтшин. **Ылҡаһы** ла **ҡалмау** туҙып, йыртылып бөтөнләй юҡҡа сығыу.

**ЫЛҠАЛАНЫУ** *ҡ. һөйл.* Тетелеп туҙыу. *Ылҡаланып бөткән күлдәк.*

**ЫЛҠАҺЫҘ** *с. һөйл.* Бик ныҡ туҙған, тетелеп бөткән. *Ылҡаһыҙ кейем.*

**ЫЛҠЫН: ылҡын итеү** мул итеп ашап-эсеү. *Ҡымыҙ һауып, бал әсетеп, ҡунаҡ килһә, ылҡын иттек.* Ф. Туйкин.

**ЫЛҠЫНЫУ** *ҡ. кар.* **йотлоғоу** 1. *Ылҡынып һыу эсеү.*

**ЫЛМАЙЫУ** *ҡ. диал.* Элмәйеү.

**ЫЛЫҒЫУ** *ҡ.* **1.** Кем йәки нимәгәлер тартылыу, һырығыу. *Түңәрәк күлгә ылығып үҫкән ҡамыштай ҡуйы ҡара керпектәреңде күтәреп бер генә ҡарасы.* Т. Йәнәби. / Күңел менән тартылып эйәләшеү, үҙләшеү. *Ылыға алмау. Ылығып китеү.* ■ *Әле һаман мәктәпкә лә, мөғәллимәгә лә ылыға алмаған Емеш, был көнө айырата ситһенеп.., моңайып ултырҙы.* З. Биишева.

**2.** Ниндәйҙер эш-хәлгә ҡатнашыу, ҡушылыу. *Мин дә буталып йөрөйөм, диңгә ҡаршы көрәшкә ылығып китәм.* К. Мәргән.

**ЫЛЫҒЫШЫУ** *ҡ. урт. кар.* **ылығыу.** *Иртәнсәк, һалҡын саҡта, һарыҡтар ылығышып ҡына йөрөйҙәр.* Ә. Вәли.

**ЫЛЫҠТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. кар.* **ылыҡтырыу** 2. *Эшкә ылыҡтырылыу.*

**ЫЛЫҠТЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Уй, күңелде тартыу; йәлеп итеү. *Игтибарҙы ылыҡтырыу.* ■ *Әллә һүҙе инде, әллә үҙе, ылыҡтырҙы мине үҙенә.* Ғ. Рамазанов.

**2.** Ниндәйҙер эш-хәлгә тартып ҡатнаштырыу; йәлеп итеү. *Эшкә ылыҡтырыу.* ■ *[Гәүһәр:] һеҙҙең йортта уҡыу йәшендәге ике кеше иҫәпләнә, мин шуларҙы мәктәпкә ылыҡтырыу мәсьәләһе менән килгәйнем.* И. Ғиззәтуллин.

**ЫЛЫМ-ШЫЛЫМ** *и. йыйн. һөйл.* Баһаһы булмаған теләһә ниндәй ваҡ-төйәк нәмәләр.

**ЫЛЫМЫҠ** *и.* Һайыраҡ урындарҙа һыу төбөнә еп һымаҡ һуҙылып, түшәлеп үҫкән, сап-һеркә ярҙамында үрсей торған үҫемлектәрҙең дөйөм исеме; сай, тәлмәрйен ебәге. *Диңгеҙ ылымығы. Һоро ылымыҡ. Йәшел ылымыҡ. Ылымыҡ баҫыу.*

**ЫЛЫҪ** *и.* **1.** Ҡайһы бер ағастарҙың энә рәүешендәге япрағы. *Ҡарағай ылыҫы. Ҡарағас ылыҫы. Шыршы ылыҫы. Ылыҫ майы. Ылыҫ оно.* ■ *Ҡарағай урманына ла килеп индем. Ҡышын да ылыҫ еҫе бөркөлөп тора бында.* Н. Мусин.

**2.** Шундай ағастың ботағы. *Тейен бер ялбыр ылыҫҡа һикереп ултырҙы.* М. Тажи.

**ЫЛЫҪЛЫ** *с.* **1.** Япрағы энә рәүешендә булған. *Ылыҫлы ағас.* / Шундай ағастарҙан торған. *Ылыҫлы урман.*

**2.** *и. мәғ.* **ылыҫлылар** *бот.* Ғәҙәттә энә рәүешендәге мәңге йәшел япраҡлы, яланғас орлоҡло ағас һәм ҡыуаҡтар класы.

**ЫЛЫУ** *и.* **1.** Һыу өҫтөндә йүгереп йөрөгән оҙон ботло үрмәксе, һыу үрмәксеһе.

**2.** *иҫк.* Аждаһа.

**3.** *иҫк. кар.* **лыу** ².

**ЫМ** *и.* **1.** Һүҙһеҙ аңлатыу өсөн бит, күҙ, баш, ҡул менән яһаған хәрәкәт; ишара. *Ым менән һөйләшеү.* ■ *[Ҡыҙҙар] ым менән дә бик һәйбәт аңлаша.* Н. Мусин. *[Әминбәк] скрипка уйнарға дейеүҙән рөхсәт һораған. Дейеү ым менән рөхсәт биргән* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Кинәйәле һүҙ. *«Аттан ала ла тыуа, ҡола ла тыуа», тип һөйләү бар. Ул тәрән кинәйә менән йәмғиәттәге ҡабиләүи, милли, синфи алаҡолалыҡҡа ым була.* Ғ. Амантай.

**ЫМЛАУ** *ҡ.* Ым менән белдереү, ишара яһау. *Ымлап күрһәтеү. Ымлап саҡырыу.* ■ *Иҫәнбирҙин Азаматовка ымлап, һин ҡал әле, тигәнде аңлатты.* Ә. Вәли.

**ЫМЛАШЫУ** *ҡ. урт. кар.* **ымлау.** *[Ҡыҙҙар] ымлашып, пырхылдап көлөп ҡуйҙылар.* М. Тажи.

**ЫМЛЫҠ** *и. лингв.* Төрлө хис-тойғоно, ихтыяр-теләкте, кисереште белдергән һүҙ (мәҫ. аба, их, уф).

**ЫММ** *ымл.* Әйтә алмай уйлап йәки икеләнеберәк торғанда әйтелә. *[Хәйрулла:] Ымм, профессор ҙа, депутат та булғас, ҙур кешеләр инде.* С. Агиш.

**ЫМПЫ** *с. диал.* Ныҡ.

**ЫМҺАҢЛАУ** *ҡ.* Риза булмайыраҡ һөйләнеү. *«Бындай бүләкте алырға минең заманым уҙған...» — тип, Үмәр ҡарт ымһаңлағайны, Бәгиҙәнең тамам сыҙамы бөттө.* Ш. Янбаев.

**ЫМҺЫН** *и. һөйл.* Ниҙәлер алыуға бағлаған эске өмөт; тамғы. **Ымһынын һалыу** нимәнеләр алырға өмөтләнеү, өмөтләнеп тороу! ымһыныу.

**ЫМҺЫНДЫРЫУ** *ҡ.* Нимәгәлер эйә булыу теләге менән күңелдән ынтылыу; өмөтләнеү, там итеү.

**ЫМҺЫНЫУ** *ҡ.* Нимәгәлер эйә булыу теләге менән күңелдән ынтылыу; өмөтләнеү, там итеү. *Сәгиҙә .. уның [Ямалдың] тұҫтағына ымһынып, кипкән ирендәрен ялап ҡуйҙы.* М. Тажи. *[Ильяс:] Аҡылың булһа, оло йәштә ымһынмаҫ инең ҡыҙға.* Б. Бикбай.

**ЫМҺЫНЫШЫУ** *ҡ. урт. кар.* **ымһыныу.** *Ымһынышып тороу.*

**ЫМШАНЫУ** *ҡ. диал.* Ымһыныу.

**ЫМЫҪ** *и. иҫк.* Ымһын.

● *Ымыҫы барҙың ырыҫы алда.* Мәҡәл.

**ЫНДЫМ** *ҡ.* Ҡарышмай ыңғай, йәһәт йөрөүсән. *Күрән ат үҙенең тәүге егәрлеге, ындымлығы менән дөмпөлдәп.. китеп барыуында ине.* Ғ. Дәүләтшин. // *Юрға ындым ғына елә.* С. Агиш.

**ЫНДЫР** *и. диал.* Ырҙын.

**ЫНДЫРҺЫҘ** *с. диал.* Ямаҡ, шыҡһыҙ.

**ЫНЙЫ** *и.* **1.** Ҡайһы бер диңгеҙ ҡабырсаҡтарында була торған аҡ, алһыу йәки ҡуйы һөт төҫөндәге затлы, перламутрлы матдә бөртөгө. *Ынйы ҡабырсағы. // Ынйы ҡашлы йөҙөк. /* Аҡ төҫтәге бик ваҡ мәрйен. *Аҡ уҡаға ынйы теҙҙем, бер бөртөгө ҡалғансы* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Йылтырап торған саф, ваҡ нәмәгә ҡарата әйтелә. *Ысыҡ ынйылары. // Ынйы теш.* ■ *Балаң илай ынйы йәш түгеп.* Н. Нәжми.

**3.** *(баш хәреф менән)* Ҡатын-ҡыҙ исеме.

◆ **Ынйы сәскә** *кар.* **сәскә.**

**ЫНЙЫҠ** *с.* Һалҡын ямғырлы, йонсоу. *Тышта көҙ, .. бик ынйыҡ ваҡыт.* Б. Бикбай.

**ЫНЙЫЛАНЫУ** *ҡ.* Ынйы кеүек йымылдау. *[Ағас япраҡтары] иртәнге ысыҡ менән сыланып, ҡояш яҡтыһында ынйыланып күренә.* Ғ. Хәйри.

**ЫНЙЫЛАУ** *ҡ.* Ынйы менән биҙәү. *Ынйылап сигеү. Сикәсуҡты ынйылау.*

**ЫНЙЫЛЫ** *с.* Ынйы менән биҙәлгән, ынйы баҫылған. *Ынйылы ҡалпаҡ.*

**ЫНЙЫ-МӘРЙЕН** *и. йыйн.* Ынйы һәм мәрйендәр; ынйы-сәйлән. *[Зөлхизәнең] ҡолаҡта — алтын алҡалар, муйында — ынйы-мәрйен муйынсалар.* З. Биишева.

**ЫНЙЫ-СӘЙЛӘН** *и. ҡар.* **ынйы-мәрйен.**

**ЫНЙЫТЫУ** *ҡ.* Ҡыйынлыҡ килтереү, яфа сиктереү; ыҙалатыу, яфалау, интектереү. *Кешене ынйытыу.* ■ *Ялбыр эт Маъмай .. күрше-ҡулән бәпкәләрен урлап ынйыта.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЫНЙЫУ** *ҡ.* Ҡыйынлыҡ кисереү, яфа сигеү; ыҙаланыу, яфаланыу, интегеү.

**ЫНТЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** Нимәгәлер йәки ҡайҙалыр үрелеү; һонолоу. *Ынтылып алыу. Ынтылып ҡарау. Ынтылып һалыу.* ■ *Тәнзилә әбей .. китеп барған ыңғайында тегенән дә, бынан да ынтылып ҡурай еләктәрен өҙөп ҡапҡылай.* М. Тажи.

**2.** Бер тарафҡа йүнәлеп, ныҡ хәрәкәт яһау; йомолоу. *Поезд ҙур ҡалаларҙа ғына туҡталыш яһай ҙа тағы ашығып алға ынтыла.. Ҡанаты ғына юҡ.* Ә. Хәкимов. *Сафа юлда нимәлер ялтырап ятҡанын күреп, тиҙерәк барып етергә ынтылды* (Әкиәттән).

**3.** *күсм.* Нимәгәлер ирешергә тырышыу, күңел менән тартылыу. *Иреккә ынтылыу. Белемгә ынтылыу.* ■ *Кеше бик борон-борондан алға ынтылған һаман.* Р. Ниғмәти. *Бөтә кош-ҡорттар .. яңыға, яҡтыға ынтылып, тырышып-тырышып, мыж килеп эшләп ята.* Ғ. Дәүләтшин. / Нимәнелер булдырырға тырышлыҡ һалыу; тырышыу. *Һәр ырыу үҙ законын, үҙ йолаларын өҫтөн ҡуйырға ынтылған.* Ә. Вахитов.

**ЫНТЫЛЫШ** *и.* **1.** Билдәле бер йүнәлештәге ныҡ хәрәкәт. *Ынтылыш яһау.* ■ *[Сәлим ағай] ҡырҡыу ынтылыш менән боролдо ла, әрә атлап ишеккә ҡарай йүнәлде.* Х. Мохтар.

**2.** Ниндәйҙер эш, маҡсатҡа йүнәлтелгән уй-теләк, дәртле ниәт. *Ынтылыш уятыу. Ынтылыш һиҙелеү.* ■ *[Егет] үҙенең белемгә булған ынтылышын туҡтатманы.* Х. Ғиләжев.

**ЫНТЫЛЫШЛЫ** *с.* Нимәгәлер йүнәлтелгән, маҡсатлы. *Ынтылышлы хәрәкәт.* ■ *Замана ни тиклем ынтылышлы был саҡта.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЫҢҒАЙ** I *и.* **1.** Ниҙендер йүнәлеш тарафы. *Һыуҙың ыңғайына йөҙөү. Юл ыңғайына барыу.* ■ *Төтөн ел ыңғайына ығып, туғайға таралды.* М. Тажи. *Шул ыңғайға һыҙылып, офоҡ буйлап, таңдың аҡһыл нуры күренә.* Д. Юлтый. / Ниҙеңдер урынлашҡан тарафы. *Ҡыҙҙар һөйләшә-һөйләшә клуб ыңғайына боролдо.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Кемдеңдер ихтыяр йүнәлеше, яйы. *Баланы ыңғайына ҡуйыу. Малды үҙ ыңғайына ебәреү. Үҙ ыңғайына сығып китеү.* ■ *Йөгө лә ауыр. Ул [Мөлөк] атын һаҡлап, ыңғайына ғына ҡыуып барһа ла, Турысайҙың ҡолаҡ төптәренән аҡ күперектәр сыға.* Т. Хәйбуллин. **Ыңғайына тороу** ҡаршы килмәй, ихтыяр биреү, яйына тороу. *Ул [Ныязгол] үҙенең ыңғайына тороп, әйелеп килгәндәрҙе ярата.* Һ. Дәүләтшина. **Ыңғайға килеү** кемдеңдер теләгенә, ихтыярына буйһоноу. *[Тура ат] бөйөрөнә ҡамсы менән бер тарткас ҡына ыңғайға килеп, юртып китте.* Һ. Дәүләтшина. **Ыңғайына һыпырыу** кемдеңдер теләгенә, ихтыярына ҡаршы килмәй, йөпләү. *[Булат:] Ул үҙ һүҙлерәк кеше, но ыңғайына һыпырһаң, йөрөй бирә.* Б. Бикбай.

**3.** Нимәгәлер ҡулай мөмкинлек; уңай, яй. *Ыңғайы сығыу. Ыңғайын табыу.* ■ *[Сөләймәнов] ҡымыҙ ташыған, ыңғайы тура килгәндә .. ҡурайын да уйнаған.* Р. Шәкүров.

**4.** 3-сө зат эйәлек аффиксы менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*ҡар.* **ыңғайы**).

**5.** Төб., у.-в. клш. аффикстары менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*ҡар.* **ыңғайҙа** 2, **ыңғайға, ыңғайына, ыңғайында**).

II *с.* **1.** Йүнәлеш тарафына тап килешле. *Диңгеҙ өҫтөндә юл таҡыр, ел ыңғай ине уның өсөн.* З. Биишева. // *Бәхетле ғашиҡтарға ел дә һәр саҡ ыңғай иҫә.* Д. Исламов.

**2.** Ҡарышмай, ҡаршылашмай, риза булып тороусан; тыңлаулы. *Ыңғай кеше.* // *Ыңғай йөрөү* ■ *Йөк менән юлға төшкәс, ат ыңғай ғына атлап бара.* Т. Хәйбуллин.

**3.** Талапҡа, теләккә ярашлы булған; яҡшы, һәйбәт. *Ыңғай йоғонто. Ыңғай күренеш. Ыңғай сифат.* // *Эш ыңғай бара.* ■ *Мәғфүрә эштең былай ыңғай яҡҡа боролоп китеүенә ҡыуанып, көлөп ебәрҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** *мат.* Нулдән ҙур булған. *Ыңғай һандар.*

**5.** *физ.* Протон, позитрон һ. б. хас электр төрөнә ҡараған. *Ыңғай заряд.*

**6.** *р. мәғ.* Һәр ваҡыт, гел. *[Ҡарт — улына:] Ыңғай уҡып йөрөү булмаҫ* (Әкиәттән).

♦ **Бер ыңғай** (*йәки* **ыңғайҙа, ыңғайҙан**) 1) бер үк ваҡытта, бер юлы. *Бер ыңғайҙан магазинға тейҙем.* ■ *[Дәүләтҡол:] Әйҙә, ҡорҙаш, миңә инеп сығайыҡ. Бер ыңғай донъямды күреп китерһең.* Я. Вәлиев; 2) бер-бер артлы. *Икенсе танкыға бер ыңғай бер нисә снаряд тейҙе.* С. Ҡулибай; **Бер ыңғайға** үҙгәрешһеҙ бер яй менән. *Бер ыңғайға ғына юртыу.* **Һүҙ ыңғай(ы)** һөйләгән саҡта. **Шул ыңғай** шул уҡ эш-хәлдән һуң; шул арала. **Юл ыңғай(ы)** юлда барышлай.

**ЫҢҒАЙҒА** *бәйл. функцияһында ҡар.* **ыңғайы.** *Килеп ингән ыңғайға.* ■ *Ағайымды ҡайтҡан ыңғайға, еңел эш тип, базарҡом итеп ҡуйҙылар.* Ғ. Вәлиев.

**ЫҢҒАЙҘА** *р.* **1.** Билдәле бер эш-хәрәкәт менән бер үк ваҡытта, бер юлы. *[Егет] ыңғайҙа кәләше буласаҡ ҡыҙға һуғыла.* К. Мәргән.

**2.** *бәйл. функцияһында* **-ған** формаһындағы сифат ҡылымдан һуң килеп, бер эш-хәрәкәттең икенсеһе менән бергә булғанлығын белдерә. *Барған ыңғайҙа һикереп төшөү.* ■ *Тәгәрмәс әйләнгән ыңғайҙа һирпелгән бысраҡ машинаның тәҙрәһен буяны.* Я. Хамматов.

**ЫҢҒАЙЛАНЫУ** *ҡ. ҡайт. ҡар.* **ыңғайлау** 2, 3. *Эштәр ыңғайланды.*

**ЫҢҒАЙЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** Билдәле бер тарафҡа йүнәлеш алдырыу. *Ханым әтен бәләкәй булмәгә ыңғайлатты.* Ф. Иҫәнғолов.

2. Уңай, яҡшы яҡҡа йүнәлтеү, яҡшыға бороу. *Сакай.. һүҙҙе үҙенә файҙалыраҡ якка ыңғайлатырға ашыкты.* Б. Бикбай.

3. Нимәгелер күндереү, ыҡҡа килтереү. *Эшкә ыңғайлатыу.*

**ЫҢҒАЙЛАУ** *к.* **1.** Билдәле бер тарафҡа йүнәлеш алыу. *Арыҫланғәле урынынан тороп, өйөнә карай ыңғайланы.* Ғ. Дәүләтшин. *Рамаҙан ауыл осона ыңғайланы.* Р. Низамов.

2. Уңай, яҡшы яҡҡа йүнәлеү; яҡшыға боролоу. *[Мәғфүрә:] Эш ыңғайлағанда кеше кирегә һөйләмәһен ул!* Һ. Дәүләтшина.

3. Кеше яйына, кеше һүҙенә күнеү; ризалыҡ күрһәтеү. *Эшкә ыңғайлау. Кәңәшкә ыңғайлау.*

**ЫҢҒАЙЛЫ** *с.* 1. Әйткәнде тыңлаған, кеше яйына килә торған; ипле. **Кеше ыңғайлы** кеше һүҙенә, кеше яйына йөрөүсән.

2. Ниндәйҙер эшкә, һөнәргә күңеле ятҡан. *Яҙыу эшенә ыңғайлы кеше.*

**ЫҢҒАЙЫ** *бәйл. функцияһында* **-ған** формаһындағы сифат ҡылымдан һуң килеп, бер эш-хәлдең артынан ҡапыл икенсеһе булғанды белдерә. *Килгән ыңғайы менән. Барып еткән ыңғайы. Һыуҙан сыккан ыңғайы.* ■ *Йылы казарманан сыккан ыңғайы өшөй төшкән тән бөтөнләй йылынып китте.* С. Кулибай.

**ЫҢҒАЙЫНА** *бәйл. функцияһында* **1.** Төп килештәге һүҙҙәр менән килеп кем йәки нәмәгәлер эйәреп, уға ярашып башҡарылғанды белдерә. *Йәштәр ыңғайына йөрөү. Көй ыңғайына баҫыу.* ■ *Карауыҙ башка эттәр ыңғайына үтеп барған һыбайлыға ла, күрше-күләндең мал-тыуарына ла абалап өрөп сыкмай.* С. Кулибай.

2. *кар.* **ыңғайы.** *[Карсык] киленде төшкән ыңғайына мактарға ярамағанын белһә лә .. әйтмәй түҙмәне.* Һ. Дәүләтшина.

**ЫҢҒАЙЫНДА** *бәйл. функцияһында.* Төп килештәге һүҙҙәрҙән һуң килеп эш-хәрәкәттең икенсе эш-хәрәкәткә бәйле рәүештә булғанлығын белдерә. *Юл ыңғайында инеп сығыу. Эш ыңғайында эшләп ташлау.* ■ *[Тәнзилә әбей] китеп барған ыңғайында .. ынтылып кcurай eлэктәрен капкылай.* М. Тажи.

**ЫҢҒЫРАУ** *к. диал.* Ыңғырашыу.

**ЫҢҒЫРАШ** *и.* Ауыртыныған, һыҙлаиған тауыш. *Һәр якта каты ыңғыраш.*

**ЫҢҒЫРАШТЫРЫУ** *к.* Ыңғырашырға мәжбүр итеү. *Ауыр тормош йәш кенә көйө тол калған катынды тағы ла ныгырак ыңғыраштыра.* Ә. Вахитов.

**ЫҢҒЫРАШЫУ** *к.* Ауыртыныл, һыҙланып йәки әсенеп әрнеүле тауыш сығарыу. *Ыңғырашкан тауыш.* ■ *Яралылар йоклай. Кайһылары йоко аралаш һаташа, кемдер ыңғыраша.* Д. Исламов. *Батша асыға башлай, хәлһеҙләнә. Каткан икмәк киҫәген көтөп ала алмай түҙемһеҙләнеп, ыңғыраша-ыңғыраша ята был* (Әкиәттән). / Әсенгән, әрнегән һымаҡ тауыш сығарыу (төрлө йәнһеҙ нәмәләргә ҡарата). *Һалкынса ел иҫеп китте... Кулгә башын эйгән карт имән, үҙенең янындағы уҫакка бәрелеп, ыңғырашып куйҙы.* Ф. Әсәнов.

● *Һабанда һайрашмаһаң, ырҙында ыңғырашырһың.* Мәҡәл.

**ЫҢҒЫРБАУ** *и. кар.* үңербау.

**ЫҢҒЫРЛАУ** *к.* Риза булыр-булмаҫ һөйләнеү.

**ЫҢҒЫРСАҠ** *и.* Өҫтөнән арҡалыҡ үткәреү өсөн аттың һыртына һалына торған, ҡуш кейеҙ мендәрҙән ғибәрәт екке әйбере. *Ыңғырсак айылы. Ыңғырсак кейеҙе. Ыңғырсак тимере.* ■ *Интәшем арбанан тиҙ генә һикереп төшөп, ыңғырсакты рәтләп, аркалык бауын күтәреп бәйләне лә, тағы арбаға ултырҙы.* М. Ғафури.

**ЫҢҒЫРСАҠЛАУ** *к.* Ыңғырсаҡ һалыу. *Атты ыңғырсаклау.*

**ЫҢҒЫР-ШЫҢҒЫР** *р.* Саҡ-саҡ һөйрәлеп, ыңғыраша, һыҙлана. *[Носрат:] Үҙем ыңғыр-шыңғыр йөрөп яткан булам.* Т. Килмөхәмәтов.

**ЫҢҠ** *окш.* Ҡапыл килеп бәрелгәндә, һуғылғанда эстән сыҡҡан өҙөк тауышты белдергән һүҙ; зыңҡ. *Ыҫк итеп калыу.*

**ЫҢҠЫЛДАТЫУ** *к.* **1.** Ыңҡ иттереү. *Һауа тулкыны .. [Һалдатты] ыңкылдатып окоп ситенә бәрҙе.* Ш. Янбаев.

2. Ыңҡ-ыңҡ иткән тауыш сығарыу. *Ыңкылдатып һыу эсеү.*

**ЫҢҠЫЛДАУ** *к.* **1.** Ыңҡ итеү. *[Сөйөмбикә] һөйәүле утынға ыңкылдап барып бәрлекте.* Ш. Янбаев.

2. Ыңҡ-ыңҡ итеү, ыңҡ-ыңҡ иткән тауыш сығарыу. *Ыңкылдап имеү.* ■ *Ыңк-ыңк итеп ыңкылдап, ерән кашка алкын ғына алдыра.* Й. Солтанов.

**ЫҢҠ-ЫҢҠ** *окш.* **1.** Шыйыҡ нәмәне йотлоғоп, алҡынып эскәндә сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; ҡолҡ-ҡолҡ. *Ыңк-ыңк килеп, йотлоғоп һыу эсеү.*

2. Ат юртҡанда күкрәгенән сыҡҡан тауышты белдергән һүҙ; уңҡ-унҡ. *Ыңк-ыңк итеп юртыу.*

**ЫҢРАУ** *к. кар.* **иңрәү.**

**ЫҢҺАРЛАУ** *к.* Ризаһыҙлыҡ белдереп һуҡраныу. *Әйләр хан ыңһарлай-ыңһарлай ғына тороп, Алпамышаға кулын бирғән, ти.* «Алпамыша».

**ЫҢ-ШАҢ** *р. кар.* **ыңғыр-шыңғыр.**

**ЫҢШАҢЛАУ** *к.* **1.** Ыңғыр-шыңғыр килеп йөрөү, һыҙланыу.

2. *кар.* **ыңғырлау.** *Коркка ыңшаңлап булһа ла күнде, кантон һүҙенә каршы килергә батырсылык итмәне.* И. Насыри.

**ЫПЫҠ** *с.* Телгә зәғиф; телһеҙ. *[Йәнбәк] бер һүҙ өндәшмәй, әйтерһең дә, ыпык кеше.* Н. Мусин.

**ЫРАЙ** *и. һөйл.* Эштең уңышлы барышы, эш барышындағы яҡшы һөҙөмтә.

**ЫРАМЛАНЫУ** *к.* Ырамлыға әйләнеү, ырамлы булыу. *Бик күп бала эйәртеп, Нурия апай менән укытыусыбыҙ ҙа килеп етте. Шунан инде эш тағы ла ырамланды.* Н. Мусин.

**ЫРАМЛАТЫУ** *к.* Ырамлы итеү. *[Тәзкирә] аҙымдарын ырамлата биреп атлауында булды.* М. Хәйҙәров.

**ЫРАМЛЫ** *с.* Тоткарлыҡһыҙ алға барған, һөҙөмтәһе һиҙелеп артҡан (эш-хәрәкәткә ҡарата). *Ырамлы эш.* // *Эш ырамлы бара.* ■ *Ул [Буранбай] яй ғына атлаһа ла, аҙымдары бик ырамлы була.* Д. Юлтый.

**ЫРАМТАЛ** *с. диал.* Ырамлы.

**ЫРАМҺЫҘ** *с.* Яй, һүлпән барған; һөҙөмтәһе бәләкәй булған. *Ырамһыҙ эш.*

**ЫРАТАҒА** *р. диал.* Бушҡа, алъюҫыҡҡа.

**ЫРАТЫУ** *к.* **1.** Яҡшы, күп һөҙөмтәле итеү; алдырыу. *Эште ыратыу.* ■ *Көҙгө көн ҡыҫҡа, йылабыраҡ барған кеше әллә ни ырата алмай.* Т. Йәнәби. *Бесән сабып ике көн үткән. Салғылар тупарланып бөткән, ыратырлыҡ хәл ҡалмаған* (Әкиәттән).

**2.** Уңыш менән алып барыу; уңдырыу. *[Әхмүш:] Семья ишле бит. Хеҙмәт көндәре аҙ булғас, тормошто бер ыратып булмай.* Д. Исламов.

**ЫРАУ** *к.* **1.** Яҡшы, күп һөҙөмтә биреү; һөҙөмтәле булыу. *Күңелең тыныс булһа, эшең дә ырай бит ул.* К. Мәргән. *[Миңнеяр] менән юлға сыҡһаң, һөйләшеп һүҙең бөтмәй, юлың ырай.* Ғ. Вәлиев.

**2.** Уңыш менән алға барыу; уңыу. *Ялҡау кешенең донъяһы ырамай.*

**ЫРАУАНЪЯН** *с.* Бошонмаған, эшкә иҫе китмәй ҡараусан; моңһоҙ. *Ырауанъян кеше.* // *Ырауанъян эшләү.*

**ЫРАУАТАЛ** *с. диал.* Ырауанъян.

**ЫРАШҠЫ** *и. кар.* **рашҡы.**

**ЫРБАЙТЫУ** *к. һөйл.* Йәмһеҙ итеп йырыу. *Ауыҙҙы ырбайтыу.*

**ЫРБАЙЫУ** *к. һөйл.* Йәмһеҙ булып асылыу; йырылыу. *Ауыҙы ырбайып тора.*

**ЫРҒАҠ**[1] *и.* **1.** Эләктереү өсөн махсус эшләнгән кәкре башлы ҡулайлама. *Тимер ырғаҡ. Сана ырғағы. Ырғаҡҡа элеү. Ырғаҡҡа эләктереү.* ■ *Таҙ арҡан башына ағас ботағынан эшләнгән ырғаҡ тағып, шул ырғаҡты һыуға ырғытып, нимәләр тартып сығарырға теләгән кеүек ултыра, ти* (Әкиәттән).

**2.** Бәйләм бәйләү өсөн ҡулланылған башы киртекле энә. *Ағас ырғаҡ. Селтәр ырғағы. Ырғаҡ менән бәйләү.*

**3.** *диал.* Ишек элгесе.

**4.** *диал.* Ирәк.

**ЫРҒАҠ**[2] *и.* Ауыҙ эсенең өҫкө тешкә яҡын ҡаты өлөшө. *Ырғаҡ боҙолоу.* ■ *Ҡыҙырас .. телен ырғағына тейҙереп, шартлатып ҡуйҙы.* З. Биишева.

**ЫРҒАҠЛАУ** *к.* Ырғаҡ[1] менән эләктереү. *Ырғаҡлап күтәртеү.*

**ЫРҒАҠЛЫ** *с.* **1.** Ырғаҡ[1] (1 мәғ.) ҡуйыулы, ырғаҡ беркетелгән. *[Егет] арҡанды ҡулына сорнаны һәм ырғаҡлы яғы менән йыуан имәндең ботағына сөйҙө.* А. Ғирфанов.

**2.** Ырғаҡ[1] (1 мәғ.) рәүешендәге, ырғаҡ һымаҡ итеп эшләнгән. *Ырғаҡлы конвейер.*

**ЫРҒАНЛАҠ** *с.* **1.** Ырғырға, һикерәндәргә яратҡан, тик тормаҫ. *Ҡыҙыҡайы торғаны менән бер ырғанлаҡ: атлағанда ла ырғый, йүгергәндә лә ырғый, тик торғанда ла ырғый.* М. Кәрим.

**2.** *кусм.* Еңел, елкенсәк холоҡло. *Ырғанлаҡ кеше.*

**ЫРҒАНЛАУ** *к. һөйл.* Урынлы-урынһыҙға һикерәнләү. *Ырғанлауҙан бушай алмай ҡыр кәзәһе һымаҡ ҡыҙ.* Ш. Бикҡол.

**ЫРҒЫЛЫУ** *к.* Ҡапыл ынтылып ырғыу, ташланыу, атылыу. *Алға ырғылыу.* ■ *Тулҡындар арыҫландай ярһып ярға ырғылалар.* А. Игебаев.

**ЫРҒЫМБАЙ** *и. диал.* Ырғанлаҡ.

**ЫРҒЫМЫС** *и. һөйл.* Шаҡмаҡлап ергә һыҙған ояларҙан ырғый-ырғый таш шыуҙырып уйнай торған ҡыҙ балалар уйыны; һыҙыҡ.

**ЫРҒЫТЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **ырғытыу.** *Ситкә ырғытылған таш. Сисеп ырғытылған кейем.*

**ЫРҒЫТЫУ** *к.* **1.** Нәмәләр аша ырғырға, һикерергә мәжбүр итеү. *Сокор аша ат ырғытыу.*

**2.** Нимәнелер ҡулға алып, көс менән киҙәнеп ебәреү; ташлау. *Курше ихатанан Таһирға таш ырғыттылар.* К. Мәргән. *Кәрим һүнгән папирос төпсөгөн кабина тәҙрәһе аша ырғытты.* Я. Хамматов.

**3.** Көс менән үргә һикертеү; сөйөү. *Һауаға ырғытыу.* ■ *Шарҙы ырғытып ебәрәләр. Шар Незнайканың башына килеп төшә* (Әкиәттән). / Юғарыға бәреп, ниҙеңдер өҫтөнә һалыу. *Мәрйәм дүрт тешле тимер һәнәк менән улар [бисәләр] ырғытҡан бесәнде йәтеш кенә кәйелдереп күтәреп ала ла, әҫкерттең бушаҡ урындарына һалып тапай.* З. Биишева.

**4.** Ситкә атып бәреү; ташлау, бырҡтырыу. *Ғимай кейемдәрен теләһә нисек ырғытып, йәһәт-йәһәт сисенде.* Ф. Иҫәнғолов.

**5.** *-ып* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып ҡушма ҡылым яһай. *Алып ырғытыу. Быуып ырғытыу. Йолҡоп ырғытыу. Сисеп ырғытыу. Сығарып ырғытыу.*

**ЫРҒЫУ** *к.* **1.** Аяҡ менән ҡапыл нығ этеп, ҡапыл ынтылып, кәүҙәне ташлау; һикереү. *Ситкә ырғыу. Ырғып менеү. Ырғып сығыу. Ырғып төшөү.* ■ *Айыу ажғырып ситкә ырғыған.* Н. Мусин. *Аҫтындағы Аҡбуҙат — Урал батыр аты ул; алдында урман торғанда, урманын да, һыуын да ырғып үткән буҙ ат ул.* «Аҡбуҙат». / Ҡапыл ынтылып, кем йәки нимәгәләр ташланыу. *Буре ҡоралайға ырғыны.*

**2.** Аяҡ менән ергә тейә-тейә, юғарыға ынтылған хәрәкәттәр яһау; һикереү. *Ырғып йөрөү. Ҡуш аяҡлап ырғыу. Шатлыҡтан ырғыу.* ■ *Гөлдөрәтеп .. аттар кешнәйҙәр. Йәшел күлдәк кейгән киң болондо тышау менән ырғып улсәйҙәр.* Ғ. Мәсғүд.

**3.** Ҡапыл ысҡынып йәки ҡаҡлығып ситкә атылыу. *[Сәреүҙең] ҡулындағы аҡ сепрәккә төрөлгән төргәк ырғып киткән.* Т. Хәйбуллин.

♦ **Ырғып тороу** ҡапыл урындан ҡалҡыу. *Ырғып тороп ултырыу.* ■ *Бер ҡатын ырғып тороп шәмдең утын ҡалҡытты.* Б. Бикбай. **Ырғып төшөү** ҙур ҡыуаныс, ҡәнәғәтлек белдереү. *[Балалар:] «Еҙнәбеҙ килгән! Еҙнәбеҙ килгән!» — тип, сәпәкәй итеп, ырғып төшәләр, ти* (Әкиәттән).

**ЫРҘЫН** *и.* **1.** Ашлыҡ һуғып, таҙартып эш итә торған таҡыр майҙанлы урын. *Ырҙынға көлтә ташыу. Ырҙында эшләү.* ■ *Йыл ямғырлы килә. Быңа шуға курә лә бер нигә ҡарамай япмалы ырҙын эшләргә кәрәк.* Н. Ҡәрип. *Ырзынға өйгән эҫкерттәр һығылар ерҙең билен.* Р. Ниғмәти. **Ырҙын асыу** ашлыҡ һуғыу өсөн эрсеп, тапатып, таҡыр майҙан яһау. **Ырҙын табағы** ашлыҡ һуға торған таҡыр майҙан.

**2.** *диал.* Кәртә артындағы баҡса; картуфлыҡ.

**ЫРЖА** [*рус.* ржа] *и. кар.* **тут**[2] 3.

**ЫРЖАЙТЫУ** *к.* Ирендә асып, теште күрһәтеү. *Теш ыржайтып көлөү.* ■ *Ҡараһа, каршы*

*яктан ауыҙҙарын асып, тештәрен ыржайтып.., ете бүре килеп сыкты, ти* (Әкиәттән).

**ЫРЖАЙЫУ** *к.* **1.** Ирендәр тартылып йәмһеҙ булып күренеү (тешкә ҡарата). *[Ляхов эттең] ыржайған тештәрен күреп, туҡтарға мәжбүр булды.* Х. Мохтар. *Хисапһыҙ ҡурҡыныслы, көслө үҙе [январ], теше ыржайған, уттай яна ике күҙе.* «Бабсаҡ менән Күсәк». / Ауыҙҙы ҙур асып йәки йәмһеҙ итеп көлөү, йылмайыу. *Насибуллин.. тағы хихылдап ыржайҙы ла, бер һүҙ ҙә өндәшмәй, ишеккә йүнәлде.* Ә. Вәли.

**2.** *күсм.* Асыу белдереү. *Донъя элек-электән шулай бит инде: бер алдын күрһәтеп йылмайһа, икенсе тапҡыр артын күрһәтеп ыржая.* И. Насыри.

**3.** Йәмһеҙ, ҙур булып асылыу; өңрәйеү. *[Әбейҙең] ҙур ялпаҡ танауы күтәрелеп, тишектәре ыржайып тора.* И. Ниғмәтуллина.

● *Өлкән өйҙә көлгәнгә кесе өйҙәге ыржайған.* Мәҡәл.

**ЫРЖАНЛАУ** *к. диал.* Йыртанлау, ҡыйшанлау.

**ЫРЖЫҠ** *с.* **1.** Ыржайып күренеп торған. *[Хәйри:] Ниңә көләһең, ыржыҡ теш!* Н. Мусин. / Ыржайып торған тешле. *Ыржыҡ йомраны убала һыҙғырып ала ине.* Й. Солтанов.

**2.** *һөйл.* Урынлы-урынһыҙға ыржайып көлөүсән.

**ЫРЙЫҠ(АЙ)** *с. һөйл.* Йыртанлап, ыръянлап тороусан.

● *Ырйыҡ ҡыҙға тыржыҡ кейәү.* Әйтем.

**ЫРМА** *и. кар.* **ырмау** [2].

**ЫРМАҠ** *и.* Ырып һыҙа, ырмау ала торған, кәкре ҡасау рәүешендәге ҡорал.

**ЫРМАНҺЫҘ** *с. диал.* Әҙәпһеҙ, оятһыҙ.

**ЫРМАУ** [1] *к.* Оҙон итеп соҡоп, ек яһау; ырыу, ырмаулау. *Өрлөктө ырмау.*

**ЫРМАУ** [2] *и.* Оҙон итеп соҡоп, уйып яһалған ек. *Ырмау алыу. Мискә ырмауы. Тәҙрә ырмауы.* ■ *[Оҫта кеше] бүрәнәләрен ырмауын ырмауға, еген еккә йәтеш килтереп һала.* Я. Вәлиев.

**ЫРМАУ** [3] *и. диал.* Үңербау.

**ЫРМАУ** [4] *и. диал. кар.* **сырмау** [3]. *Ырмау һалыу.*

**ЫРМАУЛАУ** *к.* **1.** Оҙон итеп соҡоп ек яһау; ырыу, ырмау. *Ишек таҡтаһын ырмаулау.*

**2.** *диал.* Йырғыслау. *Аҡланды киҫеп үткән һуҡмаҡ арба тәгәрмәстәре соҡорлап, ырмаулап бөткән урман юлына алып сыкты.* З. Әхмәтов.

**ЫРР** *оҡш.* Эт-бүренең асыулы тауышын белдергән һүҙ.

**ЫРҪ** *оҡш.* Бесәйҙең асыулы тауышын белдергән һүҙ.

**ЫРҪЫЛДАУ** *к.* Ырҫ-ырҫ итеү, ырҫ-ырҫ килеү.

**ЫРЪЯНЛАУ** *к. һөйл.* Күҙҙе-башты уйнатып, ҡылансыҡланыу; йыртанлау.

**ЫРЫҠ** *и. диал. кар.* **ырмау** [2].

**ЫРЫҠТА** [1] *и.* Химик элемент, күкһел аҡ төҫтәге йомшаҡ металл; цинк.

**ЫРЫҠТА** [2] *с.* **1.** Йонсоп ныҡ ябыҡҡан, хәлһеҙләнгән; кәрһеҙ. *Ырыҡта бала. // Кешеләр иһә, атам тапҡан мал түгел, тип, аттарҙы йән-фарман ҡыуып, ырыҡтаға әйләндереп бөтә.* Б. Бикбай.

**2.** Бик яй ҡуҙғалыусан; ығыш, ялҡау. *Ырыҡта ат. Ырыҡта кеше.*

**3.** *күсм.* Кирегә киткән; уңышһыҙ. *Ырыҡта эш.*

**ЫРЫҠТАЛЫ** *с.* Ырыҡта ҡатыш; ырыҡтанан яһалған. *Ырыҡталы ҡалай.* ■ *Шылтыратып тағып йөрөй ырыҡталы сулпыһын* (Халыҡ йырынан).

**ЫРЫЛДАУ** *к.* **1.** Ҡурҡытыр өсөн ырр тип айбарланыу (эткә ҡарата). *Ырылдағайны Алабай, бесәй тиҙ генә ҡасты.* К. Кинйәбулатова.

**2.** *күсм.* Асыуланып екереү. *Ул [Ҡырынбай] һаман сөй табып ырылдай.* С. Ҡудаш.

**ЫРЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **ырылдау.** *Эттәр ырылдаша.* ■ *[Нурғата] һиҫкәнеп китте: әллә ҡайҙа көсөктәр ырылдаша.* Р. Солтангәрәев.

**ЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **ырыу** [2]. *[Ҡарт:] Ана, ҡарағайҙың анауы ырылған урынын ҡара әле. Ул солоҡтоң ҡапҡас урыны.* М. Тажи.

**ЫРЫМ** [1] *и.* **1.** Халыҡта: ниндәйҙер хәл-күренеште берәй нәмәнең серле билдәһе тип ышаныу һәм шул ышаныу нигеҙендә тыуған йола, ғәҙәт; хөрәфәт. *Борондан килгән ырым. Ырым һаҡлау.* ■ *Боронғо ырым буйынса, миңе аҙмаһын өсөн уны Миңлебай тип атағандар.* З. Биишева. *Мин ырымға ышанмайым, шулай ҙа кулдәкте сиске килмәй, сөнки ул — Сажиҙә биргән бүләк.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** Нимәнеңдер арбағыс сихри көсөнә ышанып, ауырыуҙан йәки берәй төрлө яман нәмәнән ҡотолоу өсөн эшләнгән сара; халыҡ әмәле. *Ырым әйтеү. Ҡолаҡбауҙың ырымы — татран ҡыҫҡырыу.* ■ *Биҙрәләп һыу һибеүгә һүнмәгән [йәшендән ҡабынған] ут .. һөт һибеү менән һүнмәне, әлбиттә. Был тик элек-электән ҡалған бер ырым ине.* Ж. Кейекбаев.

◆ **Ырым һалыу** тылсым көсөнә ышанып, нимәгәләр ҡарап юрау. *[М. Фәйзи:] Мин янған ҡуҙға ҡарап, ырым һалып ултыра инем. Тимәк, минең һалған ырымым дөрөҫ булып сыкты,— тигән булып мәрәкәләне.* С. Кулибай.

**ЫРЫМ** [2] *и. кар.* **ырмау** [2].

**ЫРЫМЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **ырымлау.**

**ЫРЫМЛАУ** *к.* **1.** Хөрәфәт буйынса: серле билдә йәки тылсым ярҙамында ни булғанын йәки ни булырын белеү; ырым һалыу. *«Һеҙ дөйәгеҙҙе Муса урлағанын ҡайҙан белдегеҙ?» — тип һораны [ҡарт]. «Ырымлап белдек»,— тинек* (Әкиәттән).

**2.** Хөрәфәт буйынса: тылсымлы һүҙ йәки нәмә ярҙамында әмәлләү. *Ырымлап ашатыу. Ҡот ҡойоп ырымлау.* ■ *Бүҫер ырымлау.. шулай була: ырымсы бүҫер менән ауырыған кешене үҙенең алдына ҡырын ҡаратып ултыртып ҡуя ла, ауырыуҙың башын-эсен һәрмәкләп, бер ҡат өшкөргөләп сыға.* Ғ. Амантай.

**ЫРЫМСЫ** *и.* Ырым [1] (2 мәғ.) менән шөғөлләнеүсе. *[Шәғәлиҙең] өшкөртмәгән муллаһы, әмәлләтмәгән ырымсыһы ҡалмай.., ләкин ҡатыны кибә лә кибә, шифа юҡ.* Б. Бикбай.

**ЫРЫМ-СЫРЫМ** *и. йыйн.* Төрлө ырым, им-том. *Ырым-сырымға ышаныу.*

**ЫРЫҪ** *и.* **1.** Күңелгә һәр яҡлап ҡәнәғәтлек биргән тормош хәле; бәхет. *Ырыҫ артыу. Ырыҫ килеү. Ырыҫ кәмәү.* ■ *Ҡулайыуҙырыусыға.. оҙон ғүмер, ырыҫ теләнеләр.* Ғ. Дәүләтшин.

*һәр кемгә ырыҫ бирелгән яҙмыш менән.* Аҡмулла. **Ырыҫ ҡуныу** көтмәгәндә килгән бәхет.

**2.** Көтмәгәндә килгән ҡыуанyслы, шатлыҡлы хәл. *Сулпыны сәс үремемә тағып, сылтыратып ҡараным.. Был минең өсөн күрелмәгән бер ырыҫ ине.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Ырыҫ ҡошо** бәхет, ҡыуаныс килтергән төрлө сәбәп. *[Дәрүиш — Тәнкәбикәгә:] Йорт-ерең, мал-тыуарың именлектә булһын. Баш өҫтөңдән ырыҫ ҡошо китмәһен.* М. Кәрим.

**ЫРЫҪ-БӘХЕТ** *и. йыйн.* Тормошто, кеше яҙмышын ҡыуаныслы, матур иткән төрлө хәл. *Юлға сыҡтым үҙ ҡулдарым менән төҙөргә тип, ырыҫ-бәхетте.* Р. Мифтахов.

**ЫРЫҪ-ДӘҮЛӘТ** *и. йыйн.* Ырыҫ һәм байлыҡ. *[Ҡарасәс:] Ырыҫ-дәүләт менән мөгөҙ сыҡмай, ярлымын тип, кеше бойоҡмай.* Х. Ғәбитов.

**ЫРЫҪҠАЛ** *и. һөйл.* Бәхет килтергән мал, дәүләт.

● *Һаҡал — ырыҫҡал түгел.* Мәҡәл.

**ЫРЫҪ-ҠОТ** *и. йыйн.* Ырыҫ һәм ҡот. *Оло йортом Уралым, ырыҫ-ҡотом Уралым, ..һиндә минең йөрәгем.* Р. Шәкүров.

**ЫРЫҪЛЫ** *с.* Ырыҫы булған, матур яҙмышлы; бәхетле. *Ырыҫлы бала. Ырыҫлы булыу.* ■ *Илде кинәндерһен хеҙмәт уңышың, ырыҫлы һәм етеш булһын тормошоң.* А. Игебаев.

**ЫРЫҪҺЫҘ** *с.* Ырыҫ-бәхеттән мәхрүм. *Ырыҫһыҙ кеше. Ырыҫһыҙ булыу.*

**ЫРЫУ** [1] *и.* **1.** Тәүтормош йәмғиәтендә төп ойошма — бер нәҫелдән ишәйеп, бер халыҡ берәмеге булып киткән төркөм. *Ырыу ҡоролошо. Бөрйән ырыуы. Тамъян ырыуы. Үҫәргән ырыуы. Ырыу башлығы. Ырыу йолаһы. Ырыу тамғаһы.* ■ *Уларҙың [әбей менән бабайҙың] ете улы булған. Ошо ете улдан ете башҡорт ырыуы башланып киткән.* «Алып батыр».

**2.** Бер ата-бабанан сыҡҡан туғандар төркөмө; нәҫел, зат. *[Сурағол:] Ырыуым менән ярлы булып, бай тупҫаһында үҫтем.* Т. Хәйбуллин. / *диал.* Туған.

**3.** *биол.* Тереклек һәм үҫемлектәрҙең яҡын төрҙәрен берләштергән төркөм.

♦ **Ырыуҙан ҡалыу** олоғайыуҙан айлыҡ туҡтап, күрем күрмәй башлау; климактерий.

● *Ҡайһы ырыу көслө — ханды шул ҡуя, ҡайһы ырыу үҫле — ҡанды шул ҡоя.* Мәҡәл.

**ЫРЫУ** [2] *к.* Соҡоп, уйып ек яһау. *Өрлөктө ырыу. Бағананы ырыу. Иҙән таҡтаһын ырып ырмау һалыу.*

**ЫРЫУҘАШ** *и.* Кем менәндер бер ырыуға ҡараған кеше. *Йәмғиәттең мәнфәғәтен яҡлағаны, уңғанлығы.., аҡыллылығы өсөн уны [Бәҙерғолдо] ырыуҙаштары яратты.* Ғ. Хөсәйенов.

**ЫРЫУЛЫҠ** *и. кар.* **ырыу** [1] 1. *Ырыулыҡ ҡоролошо.*

**ЫРЫУ-УРБАҠ** *и. йыйн.* Нәҫел-нәсәп. *Ауыл-ауыл ултырып, ырыу-урбағың йәйелһен* (Туй йырынан).

**ЫРЫЯ** *и. кар.* **рыя** 1.

**ЫСБУТ** [*рус.* свод] *и. диал.* Мейес һикәлтәһе.

**ЫСҠАНЫУ** *к. диал.* Көсәнеү, көсөргәнеү. *Ысҡаныр эшләү.* ■ *Нисек кенә ысҡаныр ҡысҡырмаһын, уның тауышы ике-өс аҙымдан ары китмәне.* Я. Хамматов.



**ЫСҠЫЛЫҠ** *и. кар.* **осҡолоҡ.**

**ЫСҠЫНДЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **ысҡындырыу.** *Бауҙан ысҡындырылған эт.*

**ЫСҠЫНДЫРЫУ** *к.* **1.** Эләккән, ҡаптырылған, бәйләнгән ерҙән кире сығарыу. *Айылды ысҡындырыу. Ишектең келәһен ысҡындырыу.* ■ *Юламанов ҡара хром пальтоһының төймәләрен ысҡындырып ебәргән.* Н. Мусин.

**2.** Эләгеп, тотолоп йәки тартылып торған хәлдән ебәреү, бушатыу. *Епте сөйҙән ысҡындырыу. Сиртмәне ысҡындырыу.* ■ *[Сәғиҙә] етәкләп алды. Мансур ҡулын ысҡындырырға тырышты.* М. Тажи. *Аҡмырҙа янының керешен тартып, уғын ысҡындырып та ебәргән* (Әкиәттән).

**3.** Бәйле, бойондороҡло йәки тотолған хәлдән ҡотолдороу, азат итеү. *Этте бәйҙән ысҡындырыу.* ■ *[Ҡыҙ] инәлә башлай: Егет, ысҡындыра күрсе, тоҙаҡҡа ҡаптым бит* (Әкиәттән).

**4.** Ҡул менән тотҡан хәлдән бушатыу йәки тотҡан ерҙән ҡулды алыу; ебәреү. *Ысҡындырмай нык тотоу.* ■ *Зөлҡәрнәй ҡапыл һиҫкәнеп, Зөлхизәне ҡосағынан ысҡындырған.* Н. Иҙелбай. / *күсм.* Ҡасырға, китергә мөмкинлек биреү, ебәреү. *[Яҡуп егеттәргә:] Беҙгә белдерер кәрәк ине. Күмәкләһәк ысҡындырмаҫ инек.* Б. Бикбай.

**5.** *күсм.* Ауыртыуы, һыҙлауы баҫыла төшөү; ебәреү. *Тулғағы аҙыраҡ ысҡындырып торған арала [Гөлйөҙөм] хәл алып, тәрән тын алды.* Һ. Дәүләтшина.

**6.** *күсм. һөйл.* Уйламай ҡапыл әйтеп һалыу. *Яңылыш ысҡындырыу.* ■ *Дуҫтар .. ысҡындырмаҫ ҡырын һүҙ гүмеренә.* Ғ. Байбурин.

♦ **Күҙҙән ысҡындырыу** күҙҙән юғалтыу, кем йәки нәмәнелер күрмәй башлау, күҙәтә алмау; күҙ яҙлыҡтырыу. *Күҙҙән ысҡындырмай ҡарап тороу.* **Ҡулдан ысҡындырыу** файҙаланмай бушҡа ебереү, буш ҡалыу; ҡулдан ебәреү. *Малды ҡулдан ысҡындырыу.* ■ *[Хәлимов:] Ну, егет, фәрештәне ауланың бит!.. Ҡулдан ысҡындырма!* Д. Юлтый.

● *Һауалағы торнаға ышанып, ҡулдағы турғайҙы ысҡындырма.* Мәҡәл.

**ЫСҠЫНЫУ** *к.* **1.** Эләктергән, ҡаптырылған, бәйләгән хәлдән сығыу. *Ишектең элгесе ысҡынған. Күлдәктең төймәһе ысҡынған. Аттың тышауы ысҡынған.* ■ *Ҡыҙыу эш барған саҡта молотилка ҡайышы ысҡынып китте лә, эштән ваҡытлыса туҡтанылар.* Б. Бикбай.

**2.** Эләккән, тотолоп йәки тартылып торған хәлдән бушау, китеү. *Ҡулдан ысҡынып китеү.* ■ *Ағас япраҡтары саҡ ҡына ел ҡағылыу менән ботаҡтарынан ысҡына.* М. Тажи. *[Әбейҙең] бөрмәһенә ҡыҫтырған күлдәгенең һулаҡай яҡ итәге ысҡынған.* Һ. Дәүләтшина. / Тотонған, йәбешкән ерҙән айырылыу. *Тотҡанан ҡул ысҡынып китте.*

**3.** Бәйле, бойондороҡло йәки тотолған хәлдән ҡотолоу, азат булыу. *Бәйҙән ысҡыныу. Тоҙаҡтан ысҡыныу.* ■ *Үткән ғүмер уйлаһам да кире килмәй, бәйләүенән ысҡынған эттәй сапҡан.* Аҡмулла. *Аҡбаш ҡапыл төйләгәнгә ташланды, инде эләктерҙем генә тигәндә теге ысҡынып ҡотолдо.* Ә. Бикчәнтәев. *[Туғышев:] Әллә Троицкиға һыҙаһы инде. Тик бынан ысҡыныуы ҡыйын*

*эш.* А. Карнай. / *күсм.* Ауыр, ҡайын хәлдән ҡотолоу. *Солгап алған донъяның ваҡ тормошо.., көс бөтә, хәлдән таям, булмай һаман да ыҫҡынып.* М. Ғафури.

**4.** *күсм.* Һиҙҙермәй тиҙ генә китеү; тайыу, ҡасыу. *Хәби ағайымдың хаттары менән иң матур һүрәтен һелтәнем дә ыҫҡындым.* Т. Килмөхәмәтов. *Ҡуян менән төлкө һаҙға ялт ыҫҡына.* С. Кулибай.

**5.** *күсм.* Уйламаҫтан ҡапыл әйтелеү. *Ошо һүҙҙең ыҫҡыныуы булды, тирә-яҡтан ҡысҡырырға тотондолар.* Д. Юлтый.

◆ **Күҙҙән ыҫҡыныу** күренмәй, иғтибарҙан ситтә ҡалыу. *Мурзиндың .. ҡыланышы береһе лә Юлияның күҙенән ыҫҡынманы.* Һ. Дәүләтшина. **Ҡулдан ыҫҡыныу** *шул уҡ* **ҡулдан китеү** (*ҡар.* **ҡул** [1]).

**ЫСҠЫР** *и. диал.* Ыштан бауы.

**ЫСЛУБ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Тел сараларын файҙаланыу ысулы; стиль.

**ЫСУЛ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Эште башҡарыу юлы; алым. *Алдынғы ысул. Иген сәсеү ысулы.* ■ *Скважиналарҙың ҡайһы берҙәре фонтан ысулы менән эшләй, качалка менән эшләүселәр ҙә бар.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Өйрәнеү, тикшереү юлы; метод. *Аналитик ысул.*

◆ **Ысулы йәдит** *тар.* 20 быуат башында уҡыу-уҡытыу эшендәге яңы ысул. **Ысулы тәғлим** *иҫк.* методика. **Ысулы тәрбиә** *иҫк.* педагогика.

**ЫСЫҠ** *и.* Йәйге кис йәки таңда үләнгә, үҫемлек һ. б. нәмәләр өҫтөнә ҡунған һыу тамсылары. *Иртәнге ысыҡ. Киске ысыҡ.* ■ *Үләнгә сүмес менән һоҫоп алырлыҡ, тос ысыҡ төшкән.* Ф. Иҫәнғолов. *Ысыҡ кисеп, бил быуарҙан һыу булып йөрөйөм.* Н. Мусин.

**ЫСЫҠЛАНЫУ** *ҡ.* Ысыҡ менән ҡапланыу. *[Бала] уяныр, күҙҙәрен асҡан сакта, ысыҡланған, ал-гөлләнгән гүзәл бакса.* С. Кулибай.

**ЫСЫН** *с.* **1.** Ысынбарлыҡта, тормошта булған, булыуы шикһеҙ булған; дөрөҫ, хаҡ. *Ысын ваҡиға. Ысын хәл. Ысын хәбәр. // Ысынға алыу. Ысынға бороу. Ысынын әйтеү. Ысынға әйләнеү.* ■ *Яҡшы әкиәт ысынға яҡын була.* Б. Бикбай.

**2.** Алдыҡ, ялғанлыҡ ҡатышмаған, яһалмаған, асыл үҙе булған. *Ысын документ. Ысын батша.* ■ *Сыртланов бик һалмаҡ тон менән аңлатма бирергә кереште..: Был яҡтағы башҡорттар ысын башҡорттар улар.* С. Агиш. / Кем йәки нимәнеңдер асылында булған, асылын тәшкил иткән; төп. *Һүҙҙең ысын мәғәнәһе.* ■ *Ярлылар хәҙер һеҙҙең ысын йөҙөгөҙҙө күрҙе.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Яһалма түгел, тәбиғи. *Ысын гәүһәр таш. Ысын ебәк. Ысын сәскәләр.* ■ *Ысын мәрйен муйынсаңды таҡма муйының талдырып.* (Халыҡ йырынан).

**4.** Үҙ тәбиғәтенә, үҙ мәғәнәһенә ярашлы, тейешенсә булған. *Ысын йәй. Ысын дала. Ысын сәнғәт әҫәре.* ■ *Мин ысын кавалер булып вечерға киттем.* Д. Юлтый. / Иң яҡшы үрнәккә ярашлы. *Ысын дуҫлыҡ. Ысын ғалим. Ысын кеше.* ■ *Һай ир ине шул ул, Юламан, ысын ир ине.* З. Биишева. / Иң юғары кимәлдә булған. *Ысын дәрт. Ысын шатлыҡ. Ысын хис.* ■ *Әй, Бибизөһрә, һиңә төштө ысын ғишҡым, ышан.* Ш. Бабич.

**5.** *инш. функцияһында* Кемдеңдер һүҙен раҫлау рәүешендә әйтелә; ысынлап та. *[Тимерғәле:] Айбулатты беҙ үҙебеҙ хөрмәтләп ҡумәбеҙ. [Ҡарттар:] Ысын, бик һәйбәтләп үҙебеҙ ерләйек, үҙебеҙ.* Һ. Дәүләтшина. *Ысын, тәүлегенә ике-өс тапҡыр.. ауыл менән утар араһын кәлепләргә йәш малайҙы ни ул?* Ә. Хәкимов. **Ысындан да** ниҙелер раҫлау, хуплау рәүешендә әйтелә; ысынлап та.

◆ **Ысын күңелдән** *ҡар.* **күңел. Ысын мәғәнәһендә** бөтә асылы, булмышы менән. *Ысын мәғәнәһендә революция бара.* М. Тажи. **Ысынын әйткәндә** *инш.* дөрөҫлөктө белдерергә теләгәндә әйтелә. *[Гәрәй — Әскәпкә:] Ә бит, ысынын әйткәндә, Сакай һинең арҡаңда кеше булды ла баһа.* Б. Бикбай. **Ысын яһау** бик ҡупшы, матур. *Ысын яһау итеп кейенеү.*

● *Кеше ышанмаҫ хәбәрҙе ысын булһа ла һөйләмә.* Әйтем. *Ысын ҡара китмәҫ, ялған ҡара ягылмаҫ.* Мәҡәл.

**ЫСЫНБАРЛЫҠ** *и.* **1.** Тормошта, ғәмәлдә булған хәл, күренеш; нимәнеңдер тормошта, ғәмәлдә булыуы, йәшәүе. *[Емеш донъяны] йырға, әкиәткә әйләндереп, ысынбарлыҡ менән хыял араһындағы ярһыу дарьяла.. йөҙөргә кереште.* З. Биишева.

**2.** Кешелек донъяһы, кеше йәшәгән объектив шарттар. *Тарихи ысынбарлыҡ. Хәҙерге ысынбарлыҡ.*

**ЫСЫНЛАУ** *ҡ.* **1.** Ысынға әйләндереү, етди төҫ биреү.

**2.** *р. мәғ.* Хәл ҡылымдың *-п* формаһында килеп, етди рәүештә, шаярмай, ихласлап тигән мәғәнәне бирә. *Ысынлап әйтеү. Ысынлап асыуланыу. Ысынлап яратыу.* ■ *Алпамыша батыр ысынлап тотонған икән, Әйләр хандың гәскәре кире боролоп ҡаса башлаған.* «Алпамыша».

◆ **Ысынлап та** 1) ниҙер раҫлау, хуплау рәүешендә әйтелә. *Ысынлап та Зөләйхә килгән икән, күрештек.* Т. Йәнәби; 2) *инш.* әйтелгән һүҙгә баҫым яһау өсөн ҡулланыла. *[Һалдат:] Ысынлап та, һеҙ уны ҡайҙан табып эстегеҙ?* Д. Юлтый. **Ысынлап әйткәндә** *инш.* дөрөҫөн әйткәндә, ғәмәлдә. *Ысынлап әйткәндә, ул бер ҙә аҡылһыҙ түгел* (Әкиәттән).

● *Ысынлап илаһан, һуҡыр күҙҙән дә йәш сыға.* Мәҡәл.

**ЫСЫНЛЫҠ** *и.* Дөрөҫлөк, хаҡлыҡ. *Заһит еңгәһе һүҙҙәренең ысынлығына шатланды.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ғәмәлдә булған хәл.

**ЫСЫНТЫЛАУ** *ҡ. ҡар.* **ысынлау.** *Ысынтылап илау.* ■ *Ҡыҙ [егеттең] ысынтылап танышырға уйлағанын күреп .. көлдө.* Ш. Янбаев.

**ЫСЫНЫНДА** *р.* Ысын хәлде алғанда; дөрөҫөндә, ғәмәлдә. *Ысынында эш башҡасараҡ.* ■ *Фирҡәгеҙ телдә генә мосолмандарҙыҡы, ысынында ул капиталистар яҡлы.* Һ. Дәүләтшина.

**ЫСЫН-ЫСЫНДАН** *р.* Ысын мәғәнәле, ысындан да. *Музыкаға ысын-ысындан ғашиҡ кеше.*

**ЫҪ** [1] *и.* Төтөн ҡараһы, төтөн. *Ыҫ еҫе. Ыҫҡа тотоу.* ■ *Ер йыртып үкереп, төтөн ыҫына сәсәп,*

*тыны курылып, тайыш табаныбыҙ ҙа килеп сыкты.* С. Кулибай.

**ЫҪ** [2] *ымл. диал.* Ус (усэгэндэ эйтелэ). *Йосоптан котолдок. Иллэ ыҫ булды.* А. Ғирфанов.

□ **Ыҫ итеү** ус итеү. *Ыҫ итеп эшләү.*

**ЫҪЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **ыҫлау** [1]. *Ыҫланган балык.*

**ЫҪЛАУ** [1] *к.* **1.** Эшкэртеү макcатында төтөн эсеhенэ, ыҫка тотоу. *Балык ыҫлау. Корот ыҫлау. Тире ыҫлау. hаба ыҫлау. Кымыҙ көбөhөн ыҫлау.* ■ *Ыҫлар өсөн ялкын кэрэк түгел, бэлки төтөн кэрэк.* М. Ғөбэйҙуллин.

**2.** Төтөн өрҙөрөү; төтэҫлэү. *Кыш көнө айыуҙы, өңө алдына ут яғып, ыҫлайҙар. Айыу .. төтөнгэ сыҙамай өңөнэн килеп сыға.* Ж. Кейекбаев.

**3.** *диал.* hөрөмлэү, коромлау.

**ЫҪЛАУ** [2] *к. кар.* **ыҫылдау.**

**ЫҪЛЫ** *с.* Ыҫ, төтөн hеңгэн, ыҫланған. *Ыҫлы көбө.*

**ЫҪЛЫК** *и.* **1.** Ыҫ, төтөн менэн эшкэртэ торған махсус королма. *Ыҫлыкта кун ыҫлау.*

**2.** *диал.* Төтөн юлы.

**ЫҪМАЛА** [*рус.* смола] *и.* **1.** Ылыҫлы ағас йэки башка төр үҫемлектэрҙең сайырына балауыҙ, көкөрт h. б. кушып кайнатып алған кара матдэ. *Ыҫмала кайнатыу.* ■ *Коро утын өйөп сыккандар, шунан бер мискэ иреү ыҫмала түгеп, ут төртөп ебэргэндэр* (Әкиэттэн).

**2.** Синтетик юл менэн алынған төрлө органик матдэ, синтетик полимер. *Карбамид ыҫмалаhы. Таш күмер ыҫмалаhы. Эпоксид ыҫмала.*

♦ **Тау ыҫмалаhы** *кар.* **мумия** [2].

**ЫҪМАЛАЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **ыҫмалалау.** *Ыҫмалаланган тегэр еп.*

**ЫҪМАЛАЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **ыҫмалалау.** *Кэмэне ыҫмалалатыу.*

**ЫҪМАЛАЛАУ** *к.* Ыҫмалалы итеү, ыҫмалаға буяу. *Епте ыҫмалалау. Кэмэне ыҫмалалау.*

**ЫҪМАЛАЛЫ** *с.* Ыҫмала hөртөлгэн, ыҫмала hеңдерелгэн. *Ыҫмалалы еп. Ыҫмалалы бурэнэ.*

**ЫҪПАЙ** *с.* Өҫ-башы бөхтэ, йыйнак, матур булған. *Ыҫпай кеше. // Ыҫпай йөрөү.* ■ *Ыҫпай гына бисэ сынаякты алып Әхмэттең алдына куйҙы.* И. Көҫэпкол. / Килешле, купшы. *Ыҫпай кэүҙэ. // Ыҫпай кейенеү.* ■ *Кун куртка [егеттең] тэнен ыҫпай итеп кыҫып тора.* Б. Хэсэн. *Куяны куп еребеҙ, ыҫпай баҫып йөрөгэн төлкөhө куп еребеҙ* (Кобайырҙан).

**ЫҪПАЙЛАНЫУ** *к.* Ыҫпайға эйлэнеү, ыҫпай булыу. *Юлай .. өҫтөнэ тейгэн таптарҙы hыпырғыланы, ыҫпайланырга тырышты.* И. Ғиззэтуллин. *Йондоҙ [айгыр] тагы ыҫпайланып, матурланып китте.* Р. Солтангэрэев.

**ЫҪПАЙЛАУ** *к.* Ыҫпай, матур итеү; купшылау. *Зэйнэп кеше араhында үҙен тота белэ, барлы-юклы кейемен килештереп, ыҫпайлап кейэ ала.* М. Ғафури.

**ЫҪПАЙЛЫК** *и.* Ыҫпай кешегэ хас сифат. *Кыҙҙарының ыҫпайлыгы.. Урал кайынына тиң.* М. Кэрим.

**ЫҪҪ** *окш.* Кайhы бер кош, йэнлектең асыулы тауышын белдергэн hүҙ (*мэҫ.* йыландың, каҙҙың).

**ЫҪЫЛДАУ** *к.* Ыҫҫ итеү, ыҫҫ тигэн тауыш сығарыу. *Йылан ыҫылдай.* ■ *Ата каҙ.. бэпкэлэргэ якын килгэн балаларҙы, муйынын hуҙып, ыҫылдап кыуа.* А. Таhиров.

**ЫҪЫЛДАШЫУ** *к. урт. кар.* **ыҫылдау.** *Йыландар hандыктан ыҫылдашып сығып, үгэй эсэ менэн кыҙын сагырга тотонган* (Әкиэттэн).

**ЫТЫРҒАЛАНЫУ** *к. диал.* Ытырғаныу.

**ЫТЫРҒАНЫС** *с.* Ытырғаныу тойғоhо уятҡан. *[Куҙыйкурпэс] гэлэмэт ҙур, кот оскос, ытырғаныс бер януар курэ.* «Куҙыйкүрпэс менэн Маянhылыу».

**ЫТЫРҒАНЫСЛЫ** *с.* Ытырғаныу тойғоhо белдергэн. *Ытырганыслы караш.*

**ЫТЫРҒАНЫУ** *к.* **1.** Әшэке, бысрак күреп ерэнеү хисе кисереү. *Күңел ытырғана. Ауыр еҫтэн ытырғаныу.* ■ *Ауылда тиҙэк hугыу өмэлэре башланып китэ. Быcрак, ауыр эш. Әммэ бер ниндэй ытырғанып тороу булмай.* Б. Бикбай. / Күңел, тэн тартмай екhенеү. *Эшкэ тотонорга ытырғаныып торган ак hөйэктэр кэрэкмэй.* З. Биишева.

**2.** Йэн өшөткөс хистэн тетрэнеү. *Айыу шул тиклем яман үкерҙе, .. тэндэрем ытырғаныып, эллэ нисек булып китте.* Н. Мусин.

**ЫТЫРҒЫҺЫҘ** *с. диал.* Самаhыҙ күп, бөтөргөhөҙ.

**ЫУ** [1] *и.* **1.** Зэhэрле матдэ; ағыу. *Йылан ыуы. Корт ыуы.* ■ *Араларында береhе утэ яhил булган. Шуныhы.. кара йыландың агыуын кушып ыу яhаган.* Ғ. Хөсэйенов.

**2.** *кар.* **ыуа.**

♦ **Бүре ыуы** тэнгэ кысытып калккан вак сабыртҡы. *Корт сактыны — миңэ бүре ыуы калка торгайны.* Ғ. Байбурин. **Ыу сэсеү** зэhэрле hүҙ эйтеү; ағыу сэсеү.

● *Белгэн эҙэм hыу эсер, белмэгэне ыу эсер.* Мэкэл.

**ЫУ** [2] *с.* Нык эсе; зэhэр. *Ыу тоҙ.* ■ *Корoштopҙо үтеп тэнебеҙгэ ыу hыуығы февраль айының.* Ә. Моратов.

♦ **Ыу аяк** кейемде тиҙ тишеүсэн, өткөс аяк. *Ул ыу аякка көн дэ бер ойок кэрэк.*

**ЫУ** [3] *и.* hуған төплө, бер-ике генэ кыяклы зэhэр үлэн.

**ЫУА** *и.* Мал аяғындағы быуын шеше.

**ЫУАЙЫР** *р. диал.* Айырым. *Ыуайыр йөрөү.*

**ЫУАЛ** [*рус* вал ⟨ нем.] *и. кар.* **вал** [2].

**ЫУАЛАНЫУ** *к.* **1.** Туҙмэй, төрлө ерҙе ыуғылау; сэбэлэнеү. *Ярhыған корт малайҙарҙы hырып алды. Улар ыуалана — ыуалана икеhе ике яры касты.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Нык борсолоп йэки туҙемhеҙлэнеп, ыу арама килеү. *Кыҙрас бабай гына ыуалана, кайҙа бэрелергэ белмэйсэ.* Р. Бикбаев.

**ЫУАЛАУ** *к.* Кул йөрөтөп ышкыу; ыуыу. *Куҙҙе ыуалау.* ■ *Бабайҙар танауҙарын өшөтөп, ыуалай-ыуалай бара.* «Ағиҙел», 1971, № 3.

**ЫУАЛСЫК** *и. кар.* **валсык.**

**ЫУАЛЫУ** *к.* Вак-вак кына киҫэк булып таралыу; онталыу. *Ыуалып торган балсык.* ■ *Бесэн япрактары ыуалып оса.* Ғ. Дэүлэтшин. / Вак-вак киҫэк булып ярылыу. *Таш яуа башланы. Тэҙрэ быялалары сылтырап ыуалды.* А. Карнай.

**ЫУАНАС** *с. диал.* Туҙемhеҙ, сабырhыҙ.

**ЫУАР** [рус. вар] *и. кар.* **ыҫмала 1.**

**ЫУ-АРАМА:** ыу-арама килеү кем йәки ниәмә менәндер булашып ығы-зығы килеү; зыҡ ҡубыу. *Әле генә ер һиңкетеп, хужалыҡ хәстәрлеге менән ыу-арама килеп йөрөгән [Аллаяр] бөтөнләй һүнеп ҡалды.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЫУҒЫҘ** *и. диал. ҡар.* **ыуыҙ** [1] 1.

**ЫУҘЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ыуыу.** *Ыумас ыуҙырыу. Билде ыуҙырыу.*

**ЫУМАС** *и.* Әҙ генә һыуға йәки һөткә һалып, ыуып яһаған төйөрлө ҡамыр һәм шунан бешергән аш. *Ыумас ыуыу. Ыумас бешереү. Ыумас ашау.*

**ЫУ-СЫУ** *и. диал.* Сыр-сыу.

**ЫУЫҘ** [1] *и.,* **ыуыҙ һөтө 1.** Һөтимәрҙәрҙең бала килтергәс имсәккә төшкән тәүге һөтө. *Ыуыҙ һөткә туйған колонсаҡтар ҡойроҡ сәнсеп, сабып уйнаны.* Х. Ғәбитов. / Быҙаулаған һыйырҙың иң тәүге һөтө һәм шунан бешерелгән ашамлыҡ. *Ыуыҙ ашы. Ыуыҙ ҡоймағы.*

**2.** *күсм.* Ҡош балаһының суҡышы төбөндәге һары тап. *Ыуыҙы бөтмәгән себеш.*

**ЫУЫҘ** [2] *с.* Бик йәш, йомшаҡ, ныҡынмаған тигән мәғәнәлә әйтелә. *Ыуыҙ бала. Ыуыҙ мал. Ыуыҙ үлән.*

**ЫУЫЛДАТЫУ** *ҡ. һөйл.* Ҡалын тауыш менән геүләтеү.

**ЫУЫЛДАУ** *ҡ. һөйл.* Ҡалын тауыш менән геүләү. *Буран .. мейес торбаһында ыуылдай.* М. Тажи.

**ЫУЫЛДАШЫУ** *ҡ. һөйл. урт. ҡар.* **ыуылдау.**

**ЫУЫЛДЫҠ** *и. диал.* Ыуылдырыҡ.

**ЫУЫЛДЫРЫҠ** *и.* Балыҡ, моллюск, тәлмәрйен һәм башҡа ҡайһы бер ер-һыу хайуандары бүлеп сығарған ваҡ ҡына бөртөк-бөртөк йомортҡалар. *Эре бөртөклө ыуылдырыҡ. Тәлмәрйен ыуылдырығы.* ■ *Ыуылдырыҡ сәскәндә балыҡ бик һиҙгәр һәм тынғыһыҙ була.* / Балыҡтың шул йомортҡаларынан әҙерләнгән ашамлыҡ. *Ҡара ыуылдырыҡ. Ҡыҙыл ыуылдырыҡ. Бөртөклө ыуылдырыҡ.*

**ЫУЫЛЙЫМ** *с.* Баҫынҡы, һүрән. *Байып барған ҡояштың ыуылйым нурҙары аҫтында улар [кешеләр] бер нөктә булып ҡына салына ине.* Т. Килмөхәмәтов.

**ЫУЫЛЙЫТЫУ** *ҡ.* Башын әйеү, һығылдырыу. *Китмәк булдым.., еләҙ елдәр өрөп, ыуылйытып, ағастарҙың башын борғанда.* Б. Вәлит.

**ЫУЫЛЙЫУ** *ҡ.* **1.** Баш яғы баҫып әйелеү, һығылыу (үҫемлектәргә ҡарата). *Ыуылйып ултырған көртмәле.* ■ *Арыштар ыуылйып ултырған ҡырҙарҙа тыуған ул дуҫлыҡ.* Ж. Кейекбаев. / Башты түбән әйеү, һығылып төшөү (кешегә ҡарата). *Ыуылйып йоҡлап китеү.*

**2.** *һөйл.* Йомшаҡ булыу, йомшаҡлыҡтан һығылып тороу. *Ыуылйып ятҡан сырмалсыҡ үлән.*

**ЫУЫЛЙЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ыуылйыу** 1. *Ыуылйышып ултырған ҡурай еләктәре.*

**ЫУЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **ыуыу** 1. *Ыуылған ыумас.*

**2.** Ваҡланып таралыу. *Балсыҡ ыуылып тора.*

**ЫУЫНЫУ** *ҡ.* Үҙ тәнеңде ыуыу. *Дарыу менән ыуыныу.*

**ЫУЫУ** *ҡ.* **1.** Нимәнелер усҡа һалып ышҡып, киҫәктәргә тарҡатыу. *Ыумас ыуыу.* ■ *Радик бер ус башаҡ өҙөп алды. Уларҙы иләп кенә ыуҙы.* Ә. Вахитов. *Ҡап-ҡара тиреҫте ҡулға тотоп, ыуып ҡарайбыҙ.* Р. Низамов.

**2.** Ҡул йөрөтөп ышҡыу. *Билде ыуыу. Күҙҙе ыуыу. Ҡолаҡты ыуыу. Эсте ыуыу. Спирт менән ыуыу.* ■ *Аҡназаров ҡаштарын йыйырып, ..елкәһен ыуа-ыуа, Зинуҙәне тыңланы.* Ә. Вәли. / Усты усҡа ышҡыу. *Ҡулды ыуыу.*

**3.** Ниҙелер бөкләп, үҙенә үҙен ышҡыу. *Ыуып таҙартыу. Тирене ыуып йомшартыу.*

**4.** *һөйл.* Ышҡып йыуыу. *Кер ыуыу.*

**ЫХЫЛДАУ** *ҡ. ҡар.* **ыһылдау.**

**ЫҺ** *ымл.* **1.** Көсөргәнеп көс һалғанды белдерә. *Ыһ итеү. Ыһ итеп саҡ күтәреү.*

**2.** Һыҙланып ыңғырашҡанды белдерә. *Бында төндәр .. уяу әсә шикелле. Берәү ыһ тигәнгә бар тәбиғәт торор һымаҡ бына һикереп.* Х. Ғиләжев.

◆ **Ыһ итергә лә өлгөрмәй** ниҙеңдер бик етеҙ булғанын белдерә. *Ҡысҡырмаһын өсөн [Ғүмәр Әхмәтшаның] ауыҙына үҙенең түбәтәйен тыға. Тегеһе ыһ итергә лә өлгөрә алмай ҡала.* Р. Ғабдрахманов. **Ыһ та итмәү** 1) көсөргәнмәй, бик еңел башҡарыу. *Ыһ та итмәй күтәреп алыу;* 2) һуҡранмау, бирешмәү. *Заманында Шәйбәк илау түгел, ыһ та итмәҫ ине яуҙа ла.* К. Кинйәбулатова.

**ЫҺЫЛДАУ** *ҡ.* Хәл бөтөп, ыһ та аһ килеү; ахылдау. *Ыһылдап класҡа килеп инеүебеҙ булды, ҡыңғырау ҙа шылтыраны.* Й. Солтанов.

**ЫҺ-ЫҺ, ыһ та ыһ** *ымл.* Ҡабат-ҡабат ыһ иткәнде белдерә. *Ыһ та ыһ итеү. Ыһ та ыһ килеү.* ■ *[Әнтелгәлим] илленән яңы уҙған булһа ла, .. ыһ та ыһ килеп, һыҡранып йөрөй.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЫША: ыша бирмәү** 1) баш бирмәү, буйһонмау. *[Кәләмбай йылҡыларын] әйҙәп ҡараһа ла, буранға ыҡлаған мал уға ыша бирмәй.* Т. Хәйбуллин; 2) мах бирмәү, бирешмәү. *Һағыштары баштан ашҡанда ла, улар тыштан ыша бирмәйҙәр.* Ҡ. Аралбаев.

**ЫШАНДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Ниҙеңдер дөрөҫлөгөнә, ысынлығына ышаныс уятыу. *Әйтеп ышандырыу. Ышандырырлыҡ итеп һөйләп биреү.* ■ *[Йәләлетдин] аллаға ышана. Үҙе генә түгел, башҡаларҙы көсләп ышандырырға тырыша.* С. Агиш.

**2.** Ниҙеңдер теләгәнсә йәки уйлағанса булырына шик ҡалдырмай алдан ныҡытыу; өмөтләндереү. *Йылан Тимербулатты алып килеү эшен үҙ өҫтөнә алған, тик уны бында тотоп булыр тип ышандыра алмайым, тигән* (Әкиәттән).

**ЫШАНСАҠ** *с. һөйл.* Тиҙ, анһат ышаныусан. *Ышансаҡ кеше.*

**ЫШАНЫС** *и.* **1.** Берәй нәмәнең булыуына, тормошҡа ашыуына ышаныу тойғоһо. *Ышаныс уятыу.* ■ *Һеҙгә хат яҙабыҙ. Тапшырылырмы, юҡмы — уға ла ышанысыбыҙ тулы түгел.* Д. Юлтый.

**2.** Уйлаған уй-теләктең киләсәктә тормошҡа ашыуына ышаныу тойғоһо; өмөт. *Ныҡлы ышаныс. Ышаныс булыу. Ышаныс менән йәшәү.* ■ *«Хаҡлыҡ ҡасан булһа ла бер табылыр әле»,— тип уйланы Сәғиҙә. Ошо уй уға көс, ышаныс, түҙемлек бирҙе.* М. Тажи. / Кемдеңдер кешелек сифаттарына, намыҫына, эшен атҡарыуҙан йәки нимәнеңдер булмышына иҫәп тотоуҙан килгән

ышаныу тойғоһо. *Ышанысты аҡлау. Ышаныс бөтөү. Көнгә ышаныс юҡ. [Шәхми:] Ғәләүҙе шулай көйләп тормаһаң, асыу итеп йә инспекторға ошаҡлар, уға ышаныс бармы ни.* Т. Йәнәби.

♦ **Ышаныс ҡағыҙы** бер кешенең икенсе кешегә аҡса йәки ҡиммәтле бер нәмә алыу өсөн ышаныс белдереп биргән ҡағыҙы.

● *Алдыңда ышаныс булһын, артыңда таяныс булһын.* Мәҡәл.

**ЫШАНЫСЛЫ** *с.* **1.** Берәй эш-хәлдә ышанысты, өмөттө аҡларлыҡ, ышанырлыҡ. *Ышанcourtesyлы ярҙамсы.* ■ *[Фәхри] элек-электән артыҡ ышаныслы кеше түгел ине. Колхоз ойошҡандан бирле йүнләп эшләгәне юҡ.* Б. Бикбай.

**2.** Хыянат итеүҙе белмәҫ, тоғро. *Ышаныслы иптәш.* ■ *Күсәр хандың иң ышаныслы кешеләре, был хәбәрҙе ишеткәс тә, ат менеп Суҡ күле буйына китте, ти* (Әкиәттән).

**3.** Икеләнмәй эшләнгән, ныҡлы булған. *Ышаныслы аҙымдар.* // *Атлаған һайын аяктар баҫа ышаныслыраҡ.* М. Кәрим.

**ЫШАНЫУ** *к.* **1.** Ниҙендер дөрөҫлөгөн шиккә алмай ҡабул итеү. *Һүҙгә ышаныу. Әйткәнгә ышаныу.* ■ *Ғәлим ағайға ҡарайым да, шундай кешенең беҙҙең өй эсендә тыуғанына бер ҙә күңел ышанмай.* Д. Юлтый. *Бүләр хан Ҡолтубәнең таҫма теленә ышанып, тоткондан ҡотҡарған* (Әкиәттән). / Ниҙеңдер барлығын, ысынлығын шиккә алмай ҡарау. *Дингә ышаныу. Имгә ышаныу. Сихырға ышаныу. Төшкә ышаныу. Аллаға ышаныу.*

**2.** Ниҙеңдер теләгәнсә, уйлағанса булырына шик тотмай ҡарау. *Киләсәккә ышаныу. Бәхеткә* ышаныу. ■ *Йәһәннәмдәр аша уҙмайынса, ожмах табырбыҙ тип ышанма.* Ш. Бабич.

**3.** Кемдеңдер тоғролоғона шик тотмау. *Ышанып сер һөйләү.* ■ *Дуҫ-иштәрем күп тип ышанмағыҙ, хас дошманың булыр береһе.* (Халыҡ йырынан). / Берәй эш-хәлдә кем йәки нимәгәлер таяныу, иҫәп тотоу. *Ышанып эш тапшырыу. Ситтән ярҙамға ышаныу.* ■ *Нисек ышанаһың даръяға, гел тулҡынлана, гел аға.* М. Кәрим.

● *Һаҡалға ышанма, аҡылға ышан.* Мәҡәл. *Яҙғы боҙға ярҙай булһа ла ышанма, көҙгө боҙға көҙгөләй булһа ла ышан.* Әйтем. *Ялғансының өйө янған, бераү ҙә ышанмаған.* Мәҡәл.

**ЫШАҺЫҘ** *с. диал.* Бирешмәгән, уҫал, үткер кешегә ҡарата.

**ЫШҠЫЛЛЫУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **ышҡыу.** *Ышҡылып таҙартылыу. Ком менән ышҡылған тас.*

**2.** Ҡуҙғалғанда бер-береһенә тейеү. *Ышҡылып туҙыу.* ■ *Майһыҙ тәгәрмәс көпсәктәре күсәргә ышҡылып, үкереп-үкереп илаған тауыш сығара.* Т. Хәйбуллин.

**ЫШҠЫНЫУ** *к.* **1.** Тәнде нимәгәлер ышҡыу. *Ҡоймаға ышҡыныу.* ■ *[Ат] ситәнгә .. шатыр-шотор килеп ышҡына.* С. Ҡудаш. / Үҙ тәнеңде нимә менәндер ышҡыу. *Ҡар менән ышҡыныу.*

**2.** *күсм. һөйл.* Кем йәки ниҙеңдер янынан китмәй уралыу. *Клуб тирәһендә ышҡыныу.* ■ *Бер нәмә лә яҙмаған көйө, яҙыусылар ойошмаһы тирәһендә ышҡынып йөрөгән кешеләр .. һыҙып ташландылар.* С. Кулибай.

● *Һыйыр ышҡынһа, ситән ауҙарыр.* Мәҡәл.

**ЫШҠЫТЫУ** *к.* йөкм. ҡар. **ышҡыу.** *Ҡул менән ышҡытыу.*

**ЫШҠЫУ** *к.* Берәй нәмәне нимәгәлер көс менән баҫып, тегеләй-былай йөрөтөү. *Ҡом менән ышҡыу. Ышҡып йыуыу. Ышҡып һөртөү. Ышҡып ялтыратыу.* ■ *Һалсы ағай [Ғилмандың] күкрәген ышҡый, мин яһалма тын алдырырға тырышам.* Р. Низамов. *[Һунарсы] бысағын ышҡып ебәрә — таҫма ҡырҡылмай* (Әкиәттән).

**ЫШҠЫШЫУ** *к.* Бер-береңдең тәнен ышҡыу. *Арҡа ышҡышыу.*

**ЫШЛЫЯ** [*рус.* шлея] *и.* Сбруйҙың бер өлөшө: тау төшкәндә алға шылмаһын өсөн ҡамыт менән тоташ ат кәүҙәһенә кейҙерелә торған яҫы ҡайыш бау. *Ҡайыш ышлыя. Суҡлы ышлыя. Ышлыялы ҡамыт.* ■ *[Әфтәх ҡарт:] Беҙҙең аттарҙың һарҡыу төшкән сакта .. дыуамаллана торған гәҙәттәре юҡ. Улар ышлыяға ултыра беләләр.* С. Агиш.

**ЫШПАЙЫУ** *к. диал.* Шалбайыу.

**ЫШТАН** *и.* Кәүҙәнең билдән түбәнге өлөшөнә кейә торған балаҡлы йоҡа кейем. *Балалар ыштаны. Ирҙәр ыштаны. Киндер ыштан. Иҫке ыштан. Ҡыҫҡа ыштан. Оҙон ыштан. Ыштан балағы.* **Ойоҡло ыштан** ойоғо менән тоташ итеп эшләнгән ыштан.

**ЫШТАНҺЫҘ** *с.* **1.** Ыштан киймәгән. *Ыштанһыҙ бала.*

**2.** *күсм.* Артыҡ йомарт, бер ҡатлы. *[Шаһиҙулла:] Һин ыштанһыҙ, барыбер кешегә өләшеп бөтөрһөң. Көнбағышын да, муйылын да күсер минең кеҫәгә.* М. Кәрим.

**ЫШТЫР** *и.* Сабата сылғауы. *Киндер ыштыр. Ыштыр урау.*

**ЫШЫҠ** *и.* **1.** Ел-ямғыр, күҙ-колаҡтан нимәлер ҡаплап торған тыныс урын. *Тау ышығына ултырған ауыл. Урман ышығында тороу.* // *Ышыҡ ер. Ышыҡ булыу.* ■ *[Егеттәр] аттарын ышыҡта ҡалдырҙылар ҙа, үҙҙәре шым ғына ауылға ин [деләр].* К. Мәргән. *Буранша кәмәләрҙе елдән ышыҡ ҡултыҡҡа ҡыуған.* З. Биишева.

**2.** *күсм.* Кемдеңдер һағы аҫтындағы хәүефһеҙ хәл, тыныс тормош. *Ата-инә ышығында йәшәү.*

**ЫШЫҠЛАНДЫРЫУ** *к.* Ышыҡ урынға индереү. *Ағас аҫтына ышыҡландырыу.*

**ЫШЫҠЛАНЫУ** *к.* **1.** Һаҡланыр өсөн ниҙеңдер ышығына тороу, ышыҡҡа инеү. *Ағас төбөнә ышыҡланыу. Елдән ышыҡланыу.* ■ *Ямғыр үткәнсе ышыҡланып торорғамы әллә тип, Орҡоя тирә-яғына ҡаранды.* Ғ. Ибраһимов. / Күренмәҫ өсөн ниҙеңдер артына йәшенеү. *Аҡназар ағастарға ышыҡланып ҡына балаларҙың уйнағанын ҡарап тора* (Әкиәттән).

**2.** Ниҙеңдер артына инеп, күренмәҫ булыу. *Ҡояш өй ҡыйығына ышыҡлангас, көн һалҡынайтҡан һымаҡ тойолдо.* Я. Хамматов. *Күк вагондар тауға ышыҡланды.* Ғ. Сәләм.

**ЫШЫҠЛАУ** *к.* **1.** Ышыҡ яһап һаҡлау. *Елдән ышыҡлау.* ■ *Хәтимәнең гәйебе юҡ..— тине Барый, һеңлеһен арҡаһы менән ышыҡлап.* Р. Ғабдрахманов. *Айырылып ҡалгас дуҫтарынан, был бурандан кемдәр ышыҡлар.* С. Әлибаев. / Ышыҡ яһап күҙҙән йәшереү. *Бәҙри яулыҡ осо менән битен ышыҡлап, башын түбән баҫып, урам аша сыҡты.* Һ. Дәүләтшина.

2. Күҙгә күрһәтмәй ҡаплау. *Айҙы болот ышыҡлай.* ■ *Ауыл күренмәй әле, уны ағастар ышыҡлай.* Ж. Кейекбаев.

**ЫШЫҠҺЫҘ** *с.* Ышыҡланыр урыны булмаған. *Ышыҡһыҙ дала.*

**ЫШЫЛДАУ** *к. кар.* **тышылдау.**

**ЫШЫРТҠЫ** *и.* Ике башынан мисәүгә эләктереп, ат менән һалам, әүрәү кеүек нәмәләрҙе шыуҙыра торған таҡта рәүешендәге ҡулайлама. *Аҙна буйы ат та хәйлә белгән, ышыртҡы ла тамам шымарған.* Д. Юлтый.

**ЫШЫРТЫУ** *к. йөкм. кар.* **ышырыу.** *Һалам ышыртыу.*

**ЫШЫРЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **ышырыу.** *Ышырылған һалам.*

**2.** *һөйл. кар.* **һөйрәлеү.** *Ышырылып барыу.*

**ЫШЫРЫУ** *к.* Өйөлөп ятҡан нәмәне этәреп, һыпырып күсереү. *Ҡарҙы ышырыу.* ■ *Ҡыҙ иҙәнде һепереп бөтөп, сүп-сарҙы һоҫҡоға ышырҙы ла, мейескә ташланы.* Й. Солтанов.

# Э

**Э**[1] Башҡорт алфавитының утыҙ туғыҙынсы хәрефе.

**Э**[2], **э-э** һүҙҙе дауам итә алмай аптырабыраҡ торғанда әйтелә. *«Э-э!» — тип кәзә тауышы менән ҡушылды икенсе бер йәшерәге.* С. Агиш.

**ЭБЕН** [*рус.* эбеновый ⟨ *гр.*]: **эбен ағасы** тропик илдәрҙә үҫкән затлы ҡара ағастар төрө (мебель яһау өсөн ҡулланыла).

**ЭБЕР** *и.* Тирмә уғы өҫтөнә яба торған кейеҙ.

**ЭБОНИ́Т** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Яһалма һәм тәбиғи каучукты вулканизациялау юлы менән алынған ҡара төҫтәге ҡаты материал (ғәҙәттә электроникала изоляция өсөн ҡулланыла).

**ЭВАКУА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Һуғыш йәки һәләкәт ҡурҡынысы аҫтындағы кеше, мал-мөлкәт, учреждениеларҙы һәм төрлө ойошманы тейешле тәртип менән тыныс урынға күсереү эше. *Фронт яҡынлау сәбәпле приют эвакуацияға әҙерләнә.* Д. Юлтый. / Шул рәүештә күсеп киткән хәл. *Эвакуацияла йәшәү. Эвакуацияла булыу.*

**ЭВАКУАЦИЯЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **эвакуациялау.** *Эвакуацияланған халыҡ.* ■ *Өфө финанс техникумына киттек. Украинанан эвакуацияланып килеүселәрҙе ошонда урынлаштырып торғайнылар.* Ғ. Ғүмәр.

**ЭВАКУАЦИЯЛАУ** *к.* Кеше, мал-мөлкәт һәм төрлө ойошманы хәүефле урындан алып китеү; тәртип менән күсереү. *Заводты эвакуациялау.*

**ЭВАКУИРЛАУ** *к. кар.* **эвакуациялау.**

**ЭВЕН** *и.* Яҡут АССР-ында, Чукот һәм Коряк автономиялы округтарында йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (тунгус-маньчжур телдәренең береһендә һөйләшә). *Эвен халҡы. Эвен ҡатыны. Эвен теле.*

**ЭВЕНК** *и.* Эвенк автономиялы округында, Себерҙә һәм Алыҫ Көнсығыштың ҡайһы бер райондарында йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (тунгус-маньчжур телдәренең береһендә һөйләшә). *Эвенк халҡы. Эвенк ҡатыны. Эвенк теле.*

**ЭВКАЛИ́ПТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Кавказдың Ҡара диңгеҙ буйында Австралиянан килтереп үрсетелгән, мирт ағастары ғаиләһенә ҡараған бик тиҙ үҫеүсән эре ағас.

**ЭВОЛЮЦИОН** [*рус.* эволюционный] *с.* Эволюцияға мөнәсәбәтле. *Эволюцион процесс.* / Нимәнеңдер үҫешен тикшерә торған. *Эволюцион физиология.*

**ЭВОЛЮ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Кем йәки нимәнеңдер бер хәлдән икенсе хәлгә үҙгәреш, үҫеш процесы. *Кешелек донъяһының эволюцияһы. Органик донъяның эволюцияһы. Донъяға ҡараштағы эволюция.*

**2.** *филос.* Тәбиғәт һәм йәмғиәттең һан, күләм яғынан үҙгәреүе аҡрынлап сифат үҙгәрешенә килтергән үҫеш формаһы.

**ЭВФЕМИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Оят йәки ярамаған һүҙ урынына ҡулланылған әҙәпле һүҙ йәки әйтем. (*мәҫ.* **быуаҙ** урынына **ауырлы**).

**ЭГОИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Үҙенде, үҙ мәнфәғәтеңде бөтәһенән өҫтөн ҡуйыу; минлек. *Эгоизмға бирелеү.*

**ЭГОИСЛЫҠ** *и.* Эгоисҡа хас сифат; эгоизм.

**ЭГОИ́СТ** [*рус.*] *и.* Үҙен, үҙ мәнфәғәтен бөтәһенән өҫтөн ҡуйған кеше. *Эгоист булыу.* // *Эгоист кеше.* ■ *[Йәғфәр — Рәүиләгә:] Эйе, мин — эгоист. Мин һине бирәүгә лә бирергә теләмәйем.* И. Абдуллин.

**ЭГОИСТИК** *с.* Эгоизм менән һуғарылған. *Эгоистик ҡараш.*

**ЭДЕЛЬВЕ́ЙС** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Бик бейек тауҙарҙа ғына үҫә торған, ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған йөнтәҫ һабаҡлы, аҡ йондоҙ сәскәле тау үләне.

**ЭҘ** *и.* **1.** Кемдер, нимер баҫҡандан йәки үткәндән ерҙә ҡалған билге. *Аяҡ эҙе. Тәгәрмәс эҙе. Кешенең эҙе. Ҡуян эҙе. Машина эҙе. Сана эҙе.* ■ *Ишек алдында .. кергән-сыҡҡан эҙ юҡ.* Б. Бикбай. *Төлкө эҙе бик билгеле яңы ҡарҙар яуғанда* (Халыҡ йырынан). **Эҙенә төшөү** 1) эҙен табып, артабан барыу; 2) *күсм.* юғалған нәмәнең, йәшерен эштең осон табыу. *Ете көн, ете төн эҙләгәндәр батырҙар ҡыҙҙы, эҙенә төшә алмағандар* (Әкиәттән). **Эҙ йәшереү** (*йәки* **яҙлыҡтырыу, яҙҙырыу**) 1) эҙгә төшөрмәҫ өсөн юлды, йүнәлеште яңлыштырыу; 2) *күсм.* эш-ҡылыҡты йәшереү сараһын күреү, белгертмәҫкә тырышыу. *Һораша башлағас, һүҙҙе икенсегә бороп, [Баттал] эҙ йәшер[ҙе].* А. Таһиров.

**2.** Тейгән, ҡағылғандан ҡалған билге. *Бармаҡ эҙе. Ҡан эҙе. Сыбыртҡы эҙе. Теш эҙе.* ■ *[Ямалдың] сәсе туҙған, ике сикәһендә .. ҡып-ҡыҙыл эҙҙәр күренә.* М. Тажи.

**3.** Кеше хеҙмәтенән, эш-хәл, ваҡиғанан тормошта, күңелдә ҡалған билге; шауҡым. *Һуғыш эҙе. Эҙ ҡалдырыу.* ■ *Ул йылдарҙың һалған эҙҙәре юйылмаҫ әле иҫтәрҙән.* Р. Ниғмәти.

**4.** *күсм.* Эш-тормош барышында алған йүнәлеш; юл. *[Һуғыш] тыныс тормошто икенсе эҙгә төшөрҙө.* С. Агиш.

**5.** Юҡлыҡ күрһәткесе һәм *-ла* киҫәксәһе менән килеп, нимәләрҙер бөтөнләй булмауын йәки юҡҡа сығыуын күрһәтә; эҫәр. *Урмандың эҙе лә юҡ. Эҙе лә ҡалмаған.* ■ *Йорт ҡоштары, ылаш һымаҡ нәмәләрҙең эҙе лә беленмәй.* Ғ. Дәүләтшин.

♦ **Әҙең булмаһын** эргәнән ҡыуғанда, асыу менән әйтелә.

**ЭҘЕМТӘ** *и.* Төрлө эш-хәл ваҡиғаларҙың тормош барышына, кеше күңеленә яһаған йоғонтоһо, тәьҫире һәм шуның һөҙөмтәһе. *Ауыр әҙемтә килтереү. Яҡшы әҙемтә көтөү.* ■ *Экономика үҙағыш буйынса байтаҡ кимәлдә экстенсив нигеҙҙә үҫеүен дауам итте.. Әҙемтә булараҡ, хеҙмәт етештереүсәнлегенең үҫеш темптары һәм эффектлылыҡ .. күрһәткестәре етди түбәнәйҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.

**ЭҘЕ-ЮЛЫ** *и. йыйн.* Кем йәки нимәнеңдер булыу-булмауын күрһәткән билгеләр. *Утарҙың эҙе-юлы юҡ. Тик кесерткән, үлән баҫкан нигеҙ урындары ғына.* Ә. Вахитов.

**ЭҘЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Ниҙер эҙләп төрлө урынды ҡарау. *Эҙләнеп йөрөй торғас, [егет] бүлмәләрҙең береһендә бер ҡыҙға тап булған, ти* (Әкиәттән).

**2.** Белеү, асыҡлау маҡсатында төпсөп тикшереү; тикшеренеү. *Һөнәрсе эшенән бер ҡасанда кәнәғәт булмаған. Һәр ваҡыт эҙләнгән, өйрәнгән.* З. Биишева. / Төрлөсә уйлау, уйланыу. *Өс төрлө фекер тыуҙы.. Быларҙың барыһы ла беҙҙең бөтә һуғыш буйына кисергән ауырлыҡтарҙан, эҙләнеүҙәрҙән тыуған фекерҙәр.* Д. Юлтый.

**ЭҘЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **эҙләү.** *Кешенән эҙләтеү.*

**ЭҘЛӘҮ** *к.* **1.** Кемде йәки ниҙелер табырға, урынын билдәләргә тырышып, төрлө ерҙе ҡарау. *Кисеү эҙләү. Тура юл эҙләү. Ҡасҡан малды эҙләү. Юғалған нәмәне эҙләү.* ■ *Өс көндән һуң үҙебеҙҙең полкты эҙләп таптым.* Д. Юлтый. **Эт менән эҙләһәң дә табып булмаҫ** кемделер табыу мөмкин булмағанда әйтелә. / Нимәнелер булдырырға, нимәгәлер ирешергә тырышыу, шул маҡсатта эш алып барыу. *Кәләш эҙләү. Эш эҙләү.* ■ *Квартира эҙләргә тинек тә, ҡала урамы буйлап .. киттек.* С. Агиш. *Рәсәйҙең бынамын тигән егеттәре бәхет эҙләгәнгә, хаҡлыҡ эҙләгәнгә Себергә ҡыуыла.* Ә. Вахитов. / Ҡаҙылма байлыҡ табыу маҡсатында эш алып барыу. *Алтын эҙләү. Күмер яткылығы эҙләү.*

**2.** Уйлап асыҡларға, төшөнөргә, билдәләргә тырышыу. *Сара эҙләү. Яуап эҙләү.* ■ *Нисек ҡасырға тип, ҡабаланып хәйлә эҙләй башланым.* Т. Йәнәби. *Тормош диңгеҙенең серен эҙләп тәрән уйға сумып ҡалдым мин.* Ғ. Амантай.

♦ **Йомортҡанан** (*йәки* **йөйһөҙ ерҙән) йөй эҙләү** *ҡар.* **йөй. Сөй эҙләү** ғәйеп табырға тырышыу. **Көндөҙ сыра яндырып эҙләһәң дә тапмаҫһың** бик һирәк була торған нәмә тураһында һөйләгәндә әйтелә. *Үҙгәрҙе хәҙер беҙҙең ауыл. Һалам түбәле өйҙәрҙе, ситән ҡоймаларҙы, ауып-түнеп ятҡан шаҡарма ҡапҡаларҙы көндөҙ сыра яндырып эҙләһәң дә тапмаҫһың.* Д. Бүләков. **Тырнаҡ аҫтынан кер эҙләү** *ҡар.* **кер**[1]. **Эҙләгәнен тапты** (*йәки* **тапҡан)** *ҡар.* **табыу.**

**ЭҘЛӘШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **эҙләү.** *[Раушаң малайҙарға:] Эҙләй-эҙләй арып бөттөм.. Исмаһам, һеҙ эҙләшһәгеҙ ине.* Ш. Бикҡол.

**ЭҘМӘ-ЭҘ** *р.* Тейешле тәртип менән, тейешле талапҡа, тәртипкә ярашлы рәүештә. *Тынышып йәшәү принциптарын эҙмә-эҙ башҡарыу. Тәрбиә эшен эҙмә-эҙ үткәреү.*

**ЭҘМӘ-ЭҘЛЕКЛЕ** *с.* Билдәле бер тәртипкә системаға нигеҙләнгән, логик бәйләнеше булған *Эҙмә-эҙлекле рәүештә. Эҙмә-эҙлекле аңлат ма. // Эҙмә-эҙлекле фекер йөрөтөү.*

**ЭҘМӘ-ЭҘЛЕЛЕК** *и.* Эҙмә-эҙлекле булған хәл *Фекерләүҙәге эҙмә-эҙлелек. Әҫәрҙең композиц цион үҫешендә эҙмә-эҙлелек етешмәй.* ■ *Килә сәктә юридик темаға булған мәҡәләләрҙең бил дәле бер системаға һалынған, йәғни улар ара һында эҙмә-эҙлелектең булыуына иғтибар би рергә кәрәк.* «Башҡортостан ҡыҙы», 198( № 1.

**ЭҘҺЕҘ** *р.* **1.** Билгеһеҙ рәүештә, бер нинд хәбәр-хәтерһеҙ, бөтөнләй. *Эҙһеҙ юҡ булыу.* ■ *Шафиҡ .. колхоздың эҙһеҙ юғалған ике танаһы эҙләп йөрөүен егеткә әйтмәүенә үкенде.* Я. Хам матов.

**2.** Бер төрлө лә тәьҫир итмәй, йоғонтоһоҙ, һ ҙөмтәһеҙ. *Тәнҡит эҙһеҙ ҡалманы.* ■ *[Шағирҙа ҙың] һеҙҙе һөйөүе ҡалды эҙһеҙ.., эҙһеҙ үттеләр* Н. Нәжми.

**ЭҘӘРЛЕКЛӘҮ** *к.* **1.** Арттан ҡалмай ҡыуы *Эҙәрлекләп килеү.* ■ *Яраланған шайтан йүгер атлай ҡайтып киткән, Дүрмән уның артына эҙәрлекләп барған.* «Башҡорт легендалары 1969, / Арттан ҡалмай күҙәтеү, һағалау. *Эҙә леклэп йөрөү.* ■ *[Хәмит] Аралыҡ йәштәрен бандаға ҡаршы көрәшкә күтәреп, уларҙың һә аҙымын эҙәрлекләй башланы.* И. Ғиззәту лин.

**2.** *күсм.* Ирек бирмәй ҡыйырһытыу; эҙәрлә *[Милиция] беҙҙең эште бик хуплап етмәне. Ҡы ҡаһы, кеше ташып аҡса йыйған өсөн эҙәрле лә[не].* Ә. Бикчәнтәев.

**ЭҘӘРЛӘНЕҮ** *к. төш. ҡар.* **эҙәрләү.** *Эҙәрлә гән кеше.*

**ЭҘӘРЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **эҙәрләү.** *Тын бирмәй эҙәрләтеү.*

**ЭҘӘРЛӘҮ** *к.* **1.** Эҙгә төшөп ҡыуыу. *Сиҡ а үтеп китеүсе тураһында хәбәр алына. Эҙәрл бурысы Карацупа менән уның этенә йөкмәтел* С. Кулибай. / Арттан күҙәтеү, һағалау. *Тукта һыҙ эҙәрләү. Арттан ҡалмай эҙәрләү.*

**2.** *күсм.* Ирек бирмәй ҡыйырһытыу, нимәл өсөн йәберләү. *Революцион ҡараш өсөн эҙә ләү.*

**ЭҘӘРМӘН** *и.* Үткән тарих, ваҡиға һәм шу мөнәсәбәтле кешеләр юлын тикшереп эҙләнг кеше. *Фаршат класта эҙәрмәндәр группаһ менән етәкселек итә.* К. Мәргән.

**ЭЗБИЗ** [*рус.* известь] *и.* Эзбизташ, аҡбур һ башҡа карбонатлы тау тоҡомдарын яндырғ эшкәртеү юлы менән алынған матдәләрҙең д йөм исеме. *Эзбиз менән ағартыу. Төҙөлөш эзб зе. Хлорлы эзбиз. Эзбиз яндырыу. Яндырғ эзбиз.*

**ЭЗБИЗЛЕ** *с.* Эзбиз ҡатнаш. *Эзбизле ашлам*

**ЭЗБИЗЛӘНЕҮ** *к. төш. ҡар.* **эзбизләү.** *Эзби ләнгән ер.*

**ЭЗБИЗЛӘҮ** *к.* Эзбиз менән ҡатнаштыры эзбизле итеү. *Һаламды эзбизләп ашатыу.* / Э биз менән ашлау. *Эзбизләү тупраҡтың әселе кәметә.*

**ЭЗБИЗТАШ** *и.* Ак йәки һарғылт төҫтәге ка цитлы ултырма тау тоҡомо. *Эзбизташ ҡатлам*

*Эзбизташлы тау.* ■ *Эзбизташ .. төҙөлөштә һәм химия промышленносында киң файҙаланыла.* М. Хисмәтов.

**ЭЗГЕРӘЙ** *и. иҫк.* Ун тинлек боронғо тәңкә.

**ЭЙ** *ымл.* **1.** Кемгәлер өндәшкәндә, мөрәжәғәт иткәндә әйтелә. *[Егет:] «Эй, кешекәй, һин кем? Нишләп саң борҡотоп йөрөйһөң бында?» — тип һораған, ти* (Әкиәттән).— *Эй, мин ауылда ҡыяр урлап тотолғанды һөйләйем әле.* Т. Йәнәби.

**2.** Риза булмағанды, борсолоу, үкенеүҙе һ. б. белдерә. *Эй, бынауы Ямал иләк ауыҙ ҙа инде.* М. Тажи. *Эй, был ғүмер! Аҡкан һыуҙай, иҫкән елдәй үтә лә китә икән!* Р. Ғарипов.

**3.** Аптырау, ғәжәпләнеүҙе һ. б. белдерә. *Эй күңелле! Эй көн эҫе!* ■ *Эй саба ул, мин ҡыуамын, эй саба ул, мин ҡыуам.* Ш. Бабич. **Эй раббым** (*йәки* **хоҙайым**) *шул ук* **эй алла** (*кар.* **алла**).

**ЭЙҘЕРЕҮ** [1] *к. йөкм. кар.* **эйеү** [1]. *Ағасты эйҙереү.*

**ЭЙҘЕРЕҮ** [2] *к.* Һауын малдың һөтөн төшөртөү. *Айбикә .. биш һыйырҙы быҙауҙары менән эйҙереп һауып алды.* Һ. Дәүләтшина.

**ЭЙЕ** *мөн.* **1.** Кеше һүҙен хуплағанды, раҫлағанды белдерә. *Эйе шул.* ■ *«Наиләме һин?» «Эйе, Наилә. Әллә танымайһыңдамы?* С. Агиш. *Эйе, эйе, дау кәрәк, яу асырға кәрәк! Күпме кешенең тормошо боҙола эскелек арҡаһында, күпмеһе енәйәт юлына баҫа.* Ә. Хәкимов. **Эйе лә** ниҙелер ихлас итеп хуплағанда, раҫлағанда әйтелә. / *һөйл.* Нимәгәлер ышанып етмәүҙе, ҡаршы килгәнде, нимәнелер кире ҡаҡканды һ. б. белдерә. *Эйе, бармай ни, барҙы ти! Эйе, һин генә калғайның! Эйе эшләр һиңә.*

**2.** Һүҙ башында фекерҙе, һығымтаны нығытыр өсөн ҡулланыла. *Тәрбиәләй мине таш кала. Эйе, бына ошо таш кала әйләндерҙе мине башҡаға.* Ғ. Амантай.

♦ **Эйе бит** *кар.* **эйеме.**

**ЭЙЕГЕҮ** (эйек*г*) *к.* Ҡулға өйрәнеү; эйәләшеү. *Эйеккән болан. Кешегә эйекмәҫ ҡоралай. Эйекмәгән бесәй балаһы.* / Өйрәнеп үҙ күреү, эҫенеү. *[Бәгиҙә:] Ағайығыҙ .. яттан килгән кеше эйекһен, типтер инде, [мине] бик ҡәҙерләп тотто.* И. Ғиззәтуллин.

● *Бүре балаһын бүреккә һалһаң да эйекмәй.* Мәҡәл.

**ЭЙЕКТЕРЕҮ** *к.* Ҡулға өйрәтеү; эйәләштереү. *Малды эйектереү. Ҡыр йәнлеген эйектереү.*

**ЭЙЕЛДЕРЕҮ** *к.* Аҫҡа бөгөү; эйелтеү. *Иҙәнде эйелдерә баҫыу. Ағасты эйелдереү.*

**ЭЙЕЛЕП-БӨГӨЛӨҮ** *к.* Бер эйелеп, бер яҙылыу. *Ағиҙелкәйҙәргә барҙыңмы, эйелеп-бөгөлөп һыуын алдыңмы* (Халыҡ йырынан).

**ЭЙЕЛЕП-ҺЫҒЫЛЫУ** *к. кар.* **эйелеп-бөгөлөү.** *Күҙ эйәрмәй кескәй ҡулдарыңа, эйелә-һығыла дөгө урғанда.* М. Кәрим.

**ЭЙЕЛЕҮ** *к.* **1.** Билдән бөгөлөп кәүҙәне алға эйеү; иңкәйеү. *Эйелеп бер нәмә алыу. Ишектән эйелеп инеү.* ■ *Тар канауға төшәбеҙ, беҙгә эйелеп барырға кушалар.* Д. Юлтый. *Эйелеп өҙөп бирҙең миңә ике тамсы ҡайын елләген.* Р. Ғарипов. / *күсм.* Түбәнселек күрһәтеү; бил бөгөү. *[Ныязғол] үҙенә эйелеп килгәндәрҙе ярата.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Бөгөлөп аҫҡа һалыныу. *Юламан ҡарт эйелеп төшкән башын күтәреп ҡояшка ҡараны.* З. Биишева.

**3.** Ниндәйҙер ауырлыҡ нәтижәһендә урта тоштан аҫҡа бөгөлөү, һығылыу. *Китап кәштәһе эйелеп төшкән.* ■ *Атайымдың иҙәне баҫкан һайын эйелә* (Сеңләүҙән).

● *Эйелгән ағаска ел теймәҫ.* Мәҡәл.

**ЭЙЕЛТЕҮ** *к.* Аҫҡа бөгөлдөрөү; һығылдырыу. *Тау һелкетеп бейей егеттәр, юл эйелтеп саба йөрөктәр.* С. Кулибай.

**ЭЙЕЛТМӘК** *и.* Алға-артҡа бәүелеп ултырыу өсөн аҫтына түңәрәк табан ҡуйылған ултырғыс.

**ЭЙЕМ: ук эйеме** уҡтың атылған урындан төшкән еренә тиклемге ара. *Ук эйеме ер.*

**ЭЙЕМЕ** *киҫ.* Хуплауҙы, ҡеүәтләүҙе һорап мөрәжәғәт иткәндә әйтелә. *[Тимер:] Тимәк, ғәйеп атта ла, тәртәлә лә бар. Эйеме, Фатима еңгә?* Б. Бикбай.

**ЭЙЕМЕК** *с. һөйл.* Аҫҡа эйенке. *Эйемек билле ат.*

**ЭЙЕНДЕ** *и.* Ҡабат эйҙереп, елен төбөнән һауып алынған һөт. *Һауғанда ла хәҙер, элекке һымаҡ, булған тикләме булыр, тип ултырмайым.. Эйендеһенә тиклем һығып алырға тырышам.* И. Ғиззәтуллин.

**ЭЙЕНДЕКЛӘҮ** *к. һөйл.* Елен төбөндәге һөттө эйҙереү. *Эйендекләп һауыу.*

**ЭЙЕНКЕ** *с.* Бер яҡҡа эйелгән; ауыш. *Эйенке ағас.*

**ЭЙЕРЕМ** [1] *и.* Сабылған бесәндең ике башынан тартып, уртаға йыйған өйөмө. *Эйеремгә йыйыу.*

**ЭЙЕРЕМ** [2] *и. диал. кар.* **эркеү** [2].

**ЭЙЕРЕҮ** *к.* **1.** Сабылған бесәнде ике башынан тартып, уртаға өйөү. *Бесән эйереү.*

**2.** *диал.* Өйөрөү (малды).

**ЭЙЕҮ** [1] *к.* **1.** Бөгөп, аҫҡа табан төшөрөү, ауыштырыу. *Ағасты эйеү.* ■ *Зөләйха башын эйгән, бер нәмә лә өндәшмәй тик ултыра.* Т. Йәнәби. **Баш эйеү** 1) ихтирам белдереү башты аҫҡа баҫыу. *Мин баш эйәм ҡурай алдында.* Р. Сафин. *Хандың ғәскәр башы Заятүләк алдына килеп баш эйә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу»; 2) *күсм.* Буйһоноу. *Баш эймәҫ кеше.* ■ *Салауаттай ирҙәр баш эймәҫтәр, аяк-ҡулына бығау һалһаң да* (Халыҡ йырынан).

**2.** Билдән бөгөп кәүҙәне алға ауыштырыу. *Шәрифйән ағай көрһөнөп, оҙон кәүҙәһен алға эйеберәк, .. ҡайтыу яғына ыңғайланы.* Р. Низамов.

**ЭЙЕҮ** [2] *к.* Елен төбөндәге һөттө биреү, һөтөн төшөрөү (һауын малға ҡарата). *Быҙау ауыҙын тейҙереп, әҙерәк тылҡытып алмағас, һыйыр эймәй икән.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЭЙЕҮ** [3] *к.* **1.** Һарҡыу йәки тайғаҡ урындан шыуыу. *Тауҙан эйеү. Эйеп төшөү.* ■ *Һырғалаҡ юлдан шәп эйә санам.* А. Игебаев. **Һырғалаҡ эйеү** тауҙан шыуып уйнау. *Сана менән һырғалаҡ эйеү.* ■ *[Ғәмбәровтың] донъя ғәмен онотоп.., малай булып, тауҙан һырғалаҡ эйгеһе килде.* Ш. Янбаев.

**2.** *һөйл.* *ғ*п формаһындағы хәл ҡылымға эйәреп билдәле бер яҡҡа йүнәлтҡәнде белдерә; ебәреү. *Кешегә биреп эйеү. Ауылға ҡайтарып эйеү.*

**3.** *-п* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, ярҙамлыҡ ҡылым сифатында, эш-хәлдең ҡапыл башланыуын белдергән ҡушма ҡылым яһай; ебәреү. *Көлөп эйеү. Яңылыш әйтеп эйеү.* ■ *Ултыра ла торғас, йырлап эйҙем йөрәккәйҙәрем янып барғанға* (Халыҡ йырынан).

◆ **Сәңгелдәк эйеү** бәүелсәктә бәүелеү. *[Миҙхәт] баҡсаға барып, түйгәнсы сәңгелдәк эйҙе, күлдә кәмә менән йөрөнө.* Р. Ғадрахманов.

**ЭЙЕҮ**[1] *к. диал. ҡар.* **ейеү**[2].

**ЭЙҺЕНЕҮ** *к. һөйл.* Эйгән һөттө бирмәй туҡтатыу (һауын малға ҡарата).

**ЭЙӘ** *и.* **1.** Ниҙелер үҙ ҡарамағында үҙ милке итеп тотҡан кеше; хужа. *Ат эйәһе. Йорт эйәһе.* ■ *Иркәбай — йылҡы эйәһе, .. ҡунаҡ һыйлай көн һайын* (Ҡобайырҙан).

**2.** Ниҙелер алырға тәғәйен кеше. *[Почтальон] ҡайһы бер хаттарҙы эйәһенә еткермәй, кесәһенә лә тыға ине шикелле.* С. Агиш.

**3.** Ниҙелер үҙ хөкөмөндә тотҡан кеше; башлыҡ. *Власть эйәһе. Хөкүмәт эйәһе.*

**4.** Нимәгәлер һәләте булған, йәки ниндәйҙер һөнәргә, дәрәжәгә, сифат яғынан үҙгәрешкә һ. б. ирешкән кеше. *Аҡыл эйәһе. Ғилем эйәһе. Ҡәләм эйәһе. Белем эйәһе.* ■ *[Шәүәли:] «Мин судҡа бирәм!» — тип, үҙенең закон эйәһе икәнлеген күрһәтергә самалап ҡараны.* Б. Бикбай. **Эшем эйәһе** *ҡар.* **эш.**

**5.** Иҫке хөрәфәтсә, бер нәмәгә баш булған мифик зат. *Ағас эйәһе. Мал эйәһе. Мунса эйәһе. Өй эйәһе. Урман эйәһе. Һыу эйәһе.* ■ *Һыуҙан күл эйәһе килеп сыҡҡан* (Әкиәттән).

**6.** *грам.* Һөйләмдең башҡарыусыны белдергән баш киҫәге.

□ **Эйә булыу** 1) кем йәки нимәнелер үҙеңдеке тип һанау; хужа булыу. *Малға эйә булыу;* 2) берәй эш-һөнәрҙе үҙләштереү, ниндәйҙер сифатты үҙеңдә булдырыу. *Бер нисә профессияға эйә булыу. Күскә эйә булыу. Хөрмәткә эйә булыу. Әһәмиәткә эйә булыу.*

◆ **Гүр эйәһе булыу** донъянан китеү, үлеү. *Ул да мәғлүм булһын: Яппар мулла гүр эйәһе булды, бахырың.* Ғ. Әмири. **Йән эйәһе** һәр төрлө тереклек. *Изге йән эйәһе.* ■ *Бөгөн ҡояш сығыу менән ҡулына салғы тоторҙай бөтә йән эйәһе туғайға ағылды.* И. Насыри. *Йән эйәһе юҡ.* Ф. Рәхимғолова. **Күҙ эйәһе** *диал. ҡар.* **кешелек**[2]. **Ҡәбер эйәһе булыу** *ҡар.* **гүр эйәһе булыу. Минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе** еренә еткермәй, арлы-бирле эшләгәндә әйтелә. **Хәбәр (йәки һүҙ) эйәһе менән йөрөмәй** хәбәр, һүҙ тиҙ тарала, ә сығанағын белеүе ҡыйын тигән мәғәнәлә ҡулланыла.

**ЭЙӘК** *и.* Кешенең аҫҡы яңағының йөморолаңыбыраҡ торған алғы сығыңҡы өлөшө. *Ҡуш эйәк. Осло эйәк. Эйәк аҫты. Эйәк сөкөро.* ■ *Таянып эйәккә, күҙ теген йыраҡҡа, ултырам уйланып.* Ш. Бабич.

◆ **Эйәк атыу** һуңғы һулыш хәрәкәте; үлеү, йән биреү. **Эйәк ҡағыу** 1) ымлап, ишара яһау. *[Салауат] бер һүҙ әйтмәй тел менән, эйәк ҡағып барына, асыу менән ымлаған.* «Юлай менән Салауат»; 2) *ҡар.* **эйәк атыу.**

**ЭЙӘКЛӘҮ** *к. диал.* Эйәләү. *Ҡулға эйәләгән кеше.*

**ЭЙӘКСЕН** *и.* Ҡушъяулыҡты эйәк аҫлап эләк тереү өсөн сигеп йәки тәңкә баҫып таҡҡан ба *Эйәксенде гәҙәттә ҡыҙыл нәмәнән ҡуялар.*

**ЭЙӘЛЕ** *с.* Эйәһе (1 мәғ.) булған, эйәһе бар ти һаналған. *Эйәле мал. Эйәле нәмә.*

◆ **Эйәле һөйләм** *грам.* эйәһе (6 мәғ.) булға эйәһе һиҙелеп торған һөйләм.

**ЭЙӘЛЕ-БАШЛЫ: эйәле-башлы булыу** *шул у* башлы-күҙле булыу (*ҡар.* **башлы-күҙле**), **Эйәл башлы итеү** *шул уҡ* **башлы-күҙле итеү** (*ҡа* **башлы-күҙле**).

**ЭЙӘЛЕК** *и.* Нәмәнең кемдеке йәки нимәнек икәнен белдергән грамматик категория. *Эйәле алмашы. Эйәлек килеше. Эйәлек формаһы. Эй лек ялғауы.*

**ЭЙӘЛӘНЕҮ**[1] *к. һөйл.* Эйәлегә әйләнеү, эйәл булыу. *Алтын моҡсайы менән 40 йыл ятһа, имен эйәләнә.*

**ЭЙӘЛӘНЕҮ**[2] *к. диал. ҡар.* **эйәләшеү 1.** *Еге тең ҡатыны икенсе батшаға эйәләнгән икә сығып китә лә кис ҡайта, ти* (Әкиәттән).

**ЭЙӘЛӘТЕҮ** *к.* **1.** Үҙеңә өйрәтеп, яҡынлаты эҫендереү. *Кешене эйәләтеү.*

**2.** Әүрәтеп, бер урынға эҫендереү. *Мал өйгә эйәләтеү.* / Иҫке хөрәфәтсә, ен keүек нәм ләр эйәләргә ирек, мөмкинлек биреү. *Ен-шайт эйәләтеү.*

**ЭЙӘЛӘҮ** *к.* **1.** Кемгә йәки нимәгәләр өйрәне ныҡ яҡынлау; эҫенеү. *Эйәләп китеү. Йәтсә сы ҡанлы ергә эйәләй.* ■ *Үҙең эйәләтмәһәң, ятт эйәләмәй ул* (Халыҡ йырынан). **Ҡулға эйәл** кешегә өйрәнеү. *Ҡулға эйәләгән мышы.*

**2.** Берәй урынды төйәк итеп алыу, шунда кил йәки урынлашыу. *Эйәләп алыу.* ■ *[Тауҙы өҫтөнә эйәләгән ҡарҙарҙың, яҙ башланыу мен иреп.., түбән ашҡыныуы мөһабәт тауҙың битл үен .. әбейҙәр бите keүек итеп сырыштырып б төргән.* Ғ. Дәүләтшин. / Иҫке хөрәфәтсә, кеше йәки бер нәмәгә эҫенеп, китмәҫ булыу (ен-ша танға ҡарата). *Ен эйәләгән кеше. Шайтан эй ләгән мунса.*

● *Сей ергә себен эйәләй.* Мәҡәл.

**ЭЙӘЛӘШЕҮ** *к.* **1.** Кемгә йәки нимәгәләр өйр неп, күңел биреп, яҡынлау; эҫенеү, эйәләү. *Хә би шартта кеше бер-береһенә тиҙ эйәләшә. Мі дә шунда уҡ әйләнә-тирә офицерҙар, һалдатт менән танышып өлгөрҙөм.* С. Кулибай. *Ҡарам лыға бер эйәләшеп алһағыҙ, киткегеҙ ҙә килм* М. Тажи. / Кемгәләр ныҡ өйрәнеү, танып өркм башлау (хайуандарға ҡарата). *[Күк ат] бер эй ләшеп алғас, мин янынан китһәм, кешнәп.. ер тырнап бөтөрә торғайны.* Б. Ишемғол. **Ҡул эйәләшеү** кешегә өйрәнеп ҡурҡмай башл (ҡырағай йәнлеккә ҡарата) *Ҡулға эйәләшк айыу.* / Ниндәйҙер шартҡа, хәлгә күнегеү; өйр неү. *Күҙе ҡараңғыға эйәләшкәс, Хисмәтул тәүҙә ишектән һул яҡта торған биҙрәне күр* Я. Хамматов. *Был ҡаланан өркkән күсмә хал эйәләшә уның шауына.* Р. Бикбаев.

**2.** Нимәгәләр әүрәп берәй урынды төйәк ит шунда килеү йәки урынлашыу; эйәләү. *Эйә шеп алыу. Сыҫҡан эйәләшкән умартаға ҡорт йоморҡа һалмай.* ■ *Баҡсаға турғай эйәлә кәндә ҡараҫҡы ҡуйыу гәҙәтен Булаттың ишет не лә, күргәне лә бар ине.* Ш. Насыров. *Ҡу*

*бүрәнәләренең серегенә бал корттары эйәләшкәндәр икән* (Әкиәттән). / Иҫке хөрәфәтсә, кешегә йәки бер нәмәгә эҫенеп, китмәҫ булыу, эйәләү (ен-шайтанға ҡарата). *Албаҫты эйәләшкән. Бисура эйәләшеү.*

**ЭЙӘЛӘШТЕРЕҮ** *к.* **1.** Үҙенә өйрәтеп, күңелен тартып, яҡынлатыу, эҫендереү. *[Хафиз:] Анауы Ямал шаталаҡты үҙеңә эйәләштермә.* М. Тажи.

**2.** Әүрәтеп, үҙенә, берәй нәмәгә йәки урынға эҫендереү; эйәләтеү. *Малды тоҙға эйәләштереү.* ■ *Әтемде һиңә бүләк итеп бирергә булдым. Һин уны үҙеңә эйәләштер.* Ә. Бикчәнтәев. **Ҡулға эйәләштереү** ҡырағай йәнлекте үҙ иркеңә буйһондороп ҡулға өйрәтеү. / Иҫке хөрәфәтсә, эйәләшергә, эйәләп алырға ирек, мөмкинлек биреү (ен-шайтанды). *Бисура эйәләштереү.*

● *Эйәләштереү илсенән, ялҡытыу яусынан.* Мәҡәл.

**ЭЙӘР** *и.* Һыбай йөрөү өсөн менге малдың һыртына һала торған ҡулайлама. *Ирҙәр эйәре. Ҡатын-ҡыҙ эйәре. Эйәр ҡашы. Эйәр мендәре. Эйәр һалыу.* ■ *Эйәренә ырғып менде командир башлап, колаҡтарын текә сәнсеп бышҡырҙы аттар.* М. Тажи.

◆ **Һабан эйәре** һабандың ҡулауын күсәренә һалған урындағы ҡулайлама.

● *Яман эйәрҙән яйҙағым яҡшы.* Мәҡәл.

**ЭЙӘРЕҮ** *к.* **1.** Кем йәки ниҙеңдер артынан хәрәкәт итеү. *Эйәреп йөрөү. Эйәреп барыу.* ■ *Ренаттың артынан .. бәләкәй генә ҡыҙ эйәргән.* Ф. Иҫәнғолов. / *күсм.* Эштә, тормошта кемгәлер ҡарап эш итеү. *Алдынғыларға эйәреү.* ■ *Эйәрһәң дә кеше артынан белеп эйәр, эйәреүҙән шул ваҡытта файҙа тейәр.* Аҡмулла. *Яҡуп Мырҙабаев колхозға иң беренселәрҙән булып керҙе. Уның артынан башҡалар ҙа эйәрҙе.* Б. Бикбай.

**2.** Йыр йәки көйҙө башлап ебәреүсегә ҡушылыу. *Кешегә эйәреп йырлау. Эйәреп йырлап көй өйрәнеү.*

**3.** *грам.* Берәй һүҙ йәки һөйләмдең икенсе һүҙ йәки һөйләмгә буйһоноуын, бәйләнеүен күрһәтә. *Исемгә эйәреп килгән ҡылымдар.*

● *Ат аҙғыны тайға эйәрер.* Мәҡәл.

**ЭЙӘРЕҮСЕ** *и. грам.* Һүҙ бәйләнешендә төп һүҙгә мәғәнә һәм форма яғынан бәйләнгән аныҡлаусы һүҙ. *Әгәр эйәреүсе төп килештә килһә, изафет билдәһеҙлекте аңлата.* Ғ. Сәитбатталов.

**ЭЙӘРЛЕ** *с.* Эйәр һалыулы. *Баяр [ҡызға] бер эйәрле ат та тәғәйенләп ҡуйған икән.* М. Тажи.

**ЭЙӘРЛӘНЕҮ** *к. төш. ҡар.* **эйәрләү.** *Эйәрләнгән ат.*

**ЭЙӘРЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **эйәрләү.** *[Барсынһылыу] иң яҡшы аттарҙы эйәрләтеп, еңгәһе менән иптәш ҡыҙҙарын эйәртеп.., сахраға сығып китте, ти.* «Алпамыша».

**ЭЙӘРЛӘҮ** *к.* Менге малға эйәр һалыу, эйәрле итеү. *Ат эйәрләү.* ■ *Эйәрләп атҡа менгән дә, биләнә ҡылыс элгән дә, Бүгәсәү тигән шул батыр .. батшаға атыш башлаған.* Салауат Юлаев. *Ҡыҙ, ат эйәрләп, иртә менән яланға сығып киткән.* М. Тажи.

**ЭЙӘРЛӘШЕҮ** *к. урт. ҡар.* **эйәрләү.** *Ат эйәрләшеп сығып китеү.*

**ЭЙӘР-ӨПСӨН** *и. йыйн.* Һыбай йөрөүгә тәғәйенләнгән бөтә кәрәк-яраҡ. *Көмөш үңелдерек, көмөш йүгән, көмөш бөтә эйәр-өпсөнө.* Х. Ғәбитов. *[Хан Ҡуҙыйкүрпәскә] бөтә эйәр-өпсөнө, ҡоралдары менән яҡшы атын бүләк итә.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ЭЙӘРСЕН** *и.* **1.** Кемдер артынан йөрөгән, эйәреп килгән кеше. *[Байбисә:] Шул инде ул, уларҙы сакырһаң, эйәрсендәре менән йөрөрҙәр.* Ғ. Ғүмәр. / *күсм.* Эштә, тормошта кемдер ыңғайына йөрөгән, уға эйәргән кеше. *Хоббониса абыстай .. Юлдыбикә әбейгә ҡушылып, Сурағолдо, уның эйәрсендәрен яманлап ташланы.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Икенсе иргә сыҡҡан ҡатын артынан эйәреп килгән бала. *Үгәй әсә эйәрсене. // Эйәрсен бала.* ■ *Үгәй әсә бер ҙә яҡты йөҙ күрһәтмәй шул. Етмәһә, .. эйәрсене бар.* Ә. Гәрәев. *Сөнәгәт һигеҙ йәшендә әсәһе артынан эйәрсен булып барҙы.* Ж. Кейекбаев.

**3.** Планета, йондоҙ тирәһендә әйләнгән күк есеме. *Ай Ерҙең тәбиғи эйәрсене.*

**4.** *күсм.* Нимә менәндер тығыҙ бәйләнештә булып бергә осрай торған, нимәгәлер яҡын булған нәмәләргә ҡарата әйтелә. *Таш тоҙ — нефть эйәрсене. // Эйәрсен ҡала.* ■ *Нефть менән бергә ирегән газ сыға.. Был газды эйәрсен газ тип атайҙар.* Д. Бураҡаев. *[Нефтекамскийҙа] Тольятти автомобиль заводының эйәрсене — яһалма күн заводы ҡалҡып сыҡты.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 12 март.

**5.** *с. мәғ. грам.* Һөйләмдең төп һүҙенә, төп өлөшөнә буйһонған. *Эйәрсен киҫәк. Эйәрсен һөйләм.*

**ЭЙӘРТЕНЕШЕҮ** *к.* Аллы-артлы эйәреү; тағылышыу. *Эйәртенешеп йөрөү. Эйәртенешеп килеп инеү.* ■ *Эйәртенешеп Бикйән менән Көләйшә лә өйөнә ҡайтты* (Әкиәттән).

**ЭЙӘРТЕҮ** *к.* **1.** Ҡайҙалыр барғанда үҙең менән бергә алыу, бергә йөрөтөү. *Эт эйәртеү.* ■ *Ҡәйүм ҡарт Зәкиҙе эйәртеп эскә инде.* С. Агиш. *Ҡыҙрас кәләшен эйәртеп батшанан башҡа сығып китә* (Әкиәттән). / Юл башлап үҙ ыңғайыңа алып китеү. *[Салауат] егерме ике йәшендә эйәртеп гәскәр йөрөткән.* Р. Ниғмәти.

**2.** Барған, киткән кеше менән бергә оҙатыу. *Кешегә эйәртеү. Эйәртеп ебәреү.* ■ *[Ныязғол] арыу өй һалып, бер-ике баш мал эйәртеп сығарыр, .. тигән төрлө өмөттәре бушҡа сыҡты.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *грам.* Мәғнәүи йәки грамматик яҡтан бәйләү.

**ЭЙӘРТЕҮЛЕ** *с. грам.* Мәғнәүи йәки грамматик йәһәттән буйһоноулы. *Эйәртеүле бәйләнеш. Эйәртеүле ҡушма һөйләм.*

**ЭЙӘР-ТУҠЫМ** *и. диал.* Эйәр-өпсөн.

**ЭЙӘРӘЙ** *и. диал.* Кеше ҡотҡоһона бирелеүсән, эйәреүсән.

**ЭЙӘҺЕҘ** *с.* Эйәһе булмаған йәки эйәһеҙ ҡалған. *Эйәһеҙ мал.*

◆ **Эйәһеҙ һөйләм** *грам.* эйәһе булмаған, билдәһеҙ булған йәки эйәһе бөтөнләй уйланылмаған һөйләм. *Эйәһеҙ һөйләмдә һәр ваҡыт хәбәр йәки хәбәр составы ғына була.* Ғ. Сәйетбатталов.

● *Эйәһеҙ атты ил алыр.* Мәҡәл.

**ЭЙӘҺЕҘЛЕК** *и. ҡар.* **хужаһыҙлыҡ.**

**ЭКВА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. геогр.* Ер шарын Көньяҡ һәм Төньяҡ ярымшарҙарға бүлгән ике ҡотоптан тигеҙ алыҫлыҡта ятҡан шартлы һыҙыҡ. *Экватор зонаһы. Экватор аша үтеү.*

◆ **Күк экваторы** *астр.* күк көмбәҙен ике ярымшарҙарға бүлгән ҙур түңәрәк.

**ЭКВИВАЛЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* Бер нәмәгә һәр яҡһаттан тиң булып, уны алыштырырлыҡ икенсе нәмә. *Йылылыҡтың механик эквиваленты. Тауар эквиваленты.*

**ЭКВИЛИБРИ́СТИКА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Тигеҙлек һаҡлау оҫталығына ҡоролған ҡатмарлы акробатик күнегеүҙәр башҡарыуҙан торған цирк жанры.

**ЭКЗА́МЕН** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Белем кимәлен билдәләү маҡсатында үткәрелгән һынау; имтихан. *Вузға инеү экзамены. Экзамен алыу. Экзамен биреү. Экзаменға әҙерләнеү.* ■ *Ҡурҡыта ла әҙерәк ҡаушата ла экзаменға керер алдынан.* Н. Нәжми.

**ЭКЗЕ́МА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡысыттырып, ҡутырланып торған йоғошһоҙ хроник тире ауырыуы. *Экземанан интегеү.*

**ЭКЗЕМПЛЯ́Р** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Бер баҫмала сыҡҡан китаптың, ҡулъяҙманың бер бөртөгө; дана. *Ҡулъяҙманың машинкала баҫылған экземпляры.*

**ЭКЗОГА́МИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. этн.* Бер ырыу, ҡәбилә эсендә үҙ-ара өйләнешеүҙе тыйған йола. *Экзогамия өҫтөнлөк иткән ырыу.*

**ЭКЗОТИК** *с.* Ниндәйҙер урын-ер өсөн ғәҙәти булмаған, ят. *Экзотик күренеш. Экзотик илдәр.*

**ЭКЗО́ТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ниндәйҙер халыҡтың, илдең тәбиғәт, йола, сәнғәт. һ. б. нәмәләге ғәҙәти булмаған ят үҙенсәлек. *Африка экзотикаһы. Көнсығыш илдәре экзотикаһы.* ■ *Яҙыусыларҙың һәм ғалимдарҙың күпселеге башҡорттар араһына ниндәйҙер экзотика эҙләп .. килмәгән.* Ә. Харисов.

**ЭКИПА́Ж**[1] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Кеше ултырып йөрөү өсөн хеҙмәт иткән рессорлы еңел арбаларҙың дөйөм исеме. *Гостиница алдына ялтырап торған матур экипажға егелгән .. алма сыбар юртаҡ килеп туҡтаны.* Х. Мохтар.

**ЭКИПА́Ж**[2] [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Карап, самолёт, танк һ. б. шундай машиналарҙы хеҙмәтләндергән төркөм. *Карап экипажы.* ■ *Беҙ экипажда дүртәүбеҙ. Иң олобоҙ — танк командиры Иван Васильевич.* Ғ. Аллаяров.

**2.** Диңгеҙ пехотаһының яр буйында торған хәрби берәмеге.

**ЭКЛЕКТИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кит.* Төрлө йүнәлештәге ҡараш, идея һәм теорияларҙың принципһыҙ ҡушылышы.

**ЭКЛИ́ПТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. астр.* Ҡояш бер йыл эсендә әйләнеп сыға торған ҙур күк түңәрәге.

**ЭКОЛОГИК** *с.* Экологияға мөнәсәбәтле. *Экологик фактор.*

◆ **Экологик система** тереклектең үҙ мөхитенә яраҡлашыуы нигеҙендә барлыҡҡа килгән, һәр бер компоненты матдә һәм энергия алмашыныуы менән үҙ-ара бәйләнештә булған дөйөм тәбиғә[т] комплексы.

**ЭКОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Биологияның те[ре]клек һәм үҫемлектәр менән тирә-яҡ мөхи[т] араһындағы бәйләнеште өйрәнә торған бү[]леге.

**ЭКОНОМИК** *с.* **1.** *эк.* Экономикаға (1 мә[ғ.]) мөнәсәбәтле. *Экономик закондар.*

**2.** Экономиканы (2 мәғ.) ойоштороу һәм ғәмәл[]ләштереүгә мөнәсәбәтле. *Хужалыҡтың эконо[]мик күрһәткесе.*

**3.** Экономика (1, 2 мәғ.) фәнен өйрәнеү[]гә бәйле. *Экономик журнал.*

◆ **Экономик география** *ҡар.* **география** 2. **Я[ң]ы экономик политика** *ҡар.* **политика.**

**ЭКОНО́МИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *эк.* Ижтимағ[и] ҡоролоштағы хеҙмәт көстәренең үҫеш кимәле[н]ә тура килгән хеҙмәт мөнәсәбәттәре.

**2.** Айырым бер өлкә, ил, райондың хужа[лы]ҡ тормошо. *Бер йыл эсендә үҙ экономикаһын шаҡ[]тай ныгытып өлгөргән колхоз күршеләренә [ла] ярҙам итә башланы.* Х. Кәрим. / Берәй хуж[а]лыҡ тармағының төҙөлөшө, финансҡа бәй[ле] мөмкинлеге, материаль хәле. *Ауыл хужалығ[ы] экономикаһы. Промышленность экономикаһ[ы]. Сауҙа экономикаһы.*

**3.** Хужалыҡ тармағының материаль яғын өйр[ә]нә торған фән. *Экономика факультеты. Эконо[]мика буйынса лекция тыңлау.*

**ЭКОНОМИ́СТ** [*рус.*] *и.* Экономика буйынс[а] белгес. *Экономист булып эшләү.*

**ЭКОНО́МИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Материаль ҡи[ммә]ттәрҙе тотоноуҙағы һаҡсыллыҡ. *Ағас матер[и]алы бында экономия менән тотола.* К. Мәргән. Һаҡсыллыҡ арҡаһында килгән файҙа. *Экономи[я] яһау.*

◆ **Политик экономия** *ҡар.* **политэкономия.**

**ЭКОНОМИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **экономи[я]лау.** *Экономияланған аҡса.*

**ЭКОНОМИЯЛАУ** *ҡ.* Һаҡлап тотоноу нигеҙе[н]дә экономия яһау. *Металды экономияла[у]. Электр энергияһын экономиялау.*

**ЭКРА́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** *тех.* Төрлө энерги[я]ның нурын файҙаланыу йәки һаҡланыу өсөн ун[ы] сағылдыра, йота йә үҙгәртә торған яҫы йөҙ[] ҡоролма. *Радиоаппаратура экрандары.* / Н[урҙы] сағылдырып һүрәт кәүҙәләндерә торған яҫылы[ҡ]. *Телевизор экраны.*

**2.** Кино һәм диапозитив һүрәттәр күрһәт[еү] өсөн ҡуйылған аҡ шаршау йәки аҡҡа буял[ған] стена. *Лабораторияның бер яҡ стенаһына [а]к экран элеп ҡуйылған.* Ә. Ғиззәтов.

**ЭКРАНЛАШТЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **экра[н]лаштырыу.** *Экранлаштырылған пьеса.*

**ЭКРАНЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Әҫәрҙе фильм[ға] әйләндереү, киноға төшөрөү. *Романды экра[н]лаштырыу.*

**ЭКСКАВА́ТОР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Ер ҡаҙа һ[әм] сүмесе менән һоҫоп тейәй торған үҙе йөрөмә[ле] машина. *Бер сүмесле экскаватор. Күп сүмес[ле] экскаватор. Роторлы экскаватор.* ■ *Экскават[ор] йәнә, ярһып-ярһып, ер ҡыртышын кимерер[гә] керешә.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЭКСКАВАТОРСЫ** *и.* Экскаваторҙа эшләг[ән] кеше.

**ЭКСКУРС** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Һүҙ ыңғайында икенсе бер мәсьәләгә аңлатма биреү өсөн төп фекерҙән ситкә тайпылыш. *Тарихи экскурс. Экскурс яһау.* ■ *[Әҫәрҙә] үткәнде хикәйәләү төп геройҙың монологы аша тарихҡа экскурс яһау формаһында бирелә.* М. Минһажетдинов.

**ЭКСКУРСАНТ** [*рус.*] *и.* Экскурсияла ҡатнашҡан кеше. *Экскурсанттар төркөмө.*

**ЭКСКУРСИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Танышыу, күреү йәки күңел асыу маҡсатында күмәк кешенең бергәләп ҡайҙалыр барыуы. *Экскурсияға барыу. Экскурсия яһау. Экскурсия бюроһы.*

**ЭКСКУРСОВОД** [*рус.*] *и.* Экскурсия ваҡытында һөйләп, таныштырып йөрөгән кеше.

**ЭКСПАНСИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Капиталистик дәүләт йәки монополистик төркөмдөң экономик һәм башҡа төрлө саралар менән яңы ерҙәр яулап алыуға йүнәлтелгән эшмәкәрлеге. *Империалистик экспансия. Политик экспансия. Экономик экспансия.*

**ЭКСПАТРИАЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Кемдеңдер гражданлыҡ хоҡуғынан мәхрүм ителеүе һәм илдән ҡыуылыуы йәки гражданлыҡтан үҙ ирке менән баш тартыуы.

**ЭКСПЕДИТОР** [*рус.*] *и.* Ниҙәлер тейешле урынға таратыу, ебәреү менән шөғөлләнгән хеҙмәткәр. *Ағайым Мөхәмәтйән экспедитор — типографияла баҫылған газеталарҙы бөкләп, адрес йәбештереп, почтаға илтеп тапшыра.* С. Агиш.

**ЭКСПЕДИЦИОН** [*рус.* экспедиционный] *с.* Экспедиция үткәреүгә мөнәсәбәтле. *Экспедицион төркөм.*

**ЭКСПЕДИЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Бер төркөм кешенең махсус эш менән ҡайҙалыр барыуы. *Археологик экспедиция. Геологик экспедиция. Экспедицияға сығыу.* ■ *Дүрт атҡа экспедиция ҡорамалдары һәм ун көнгә етерлек аҙыҡ-түлек артып, .. маршрутҡа сығып киттек.* Д. Буракаев.

**2.** Шул эшкә сыҡҡан кешеләр төркөмө. *Экспедиция етәксеһе. Экспедиция составы. Экспедиция ойоштороу.*

**3.** Берәй учреждение, предприятиеның ниҙәлер тейешле урынға оҙатыу, таратыу эшен башҡарған бүлеге.

**ЭКСПЕРИМЕНТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Төрлө эш-хәл, күренештәрҙе өйрәнеү, тикшереү маҡсатында төрлө шарттарҙа күҙәтеү йәки уларҙы яһалма рәүештә ҡабаттан тыуҙырыу эше; ғилми маҡсатта үткәрелгән тәжрибә. / *филос.* Тәбиғи һәм тәбиғи булмаған яһалма шарттарҙа тикшереү, өйрәнеү нигеҙендә ысынбарлыҡты танып белеү алымы.

**2.** Ниҙәлер тормошҡа ашырыу юлын һынап ҡарау алымы. *Сәғиҙә, үҙенсә, Мансурға ҡарата бер эксперимент ҡулланып ҡарарға булды.* М. Тажи.

**ЭКСПЕРИМЕНТАЛЬ** [*рус.* экспериментальный] *с.* **1.** Экспериментҡа мөнәсәбәтле. *Эксперименталь эш.*

**2.** Экспериментҡа нигеҙле. *Эксперимнталь медицина. Эксперименталь физика. Эксперименталь фонетика.*

**ЭКСПЕРИМЕНТАТОР** [*рус.*] *и.* Эксперимент үткәреүсе.

**ЭКСПЕРТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] **1.** Ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәлә буйынса һығымта яһағанда ылыҡтырылған белгес. *Картинаның төп нөсхәме, түгелме икәнлеген асыҡлау өсөн .. эксперттар ебәрелде.* «Совет Башҡортостаны», 1966, 22 февраль.

**2.** *юр.* Суд эштәре буйынса экспертиза яһау өсөн дәүләт һәм йәмғиәт органдары тарафынан ылыҡтырылған махсус белемле кеше. *Суд эксперты.*

**ЭКСПЕРТИЗА** [*рус.*] *и.* **1.** Ҡатмарлы, бәхәсле эш-хәлдең фән, техника, сәнғәт һ. б. өлкә белгестәре тарафынан тикшерелеүе, ҡаралыуы. *Ғилми экспертиза. Техник экспертиза. Экспертизаға ебәреү. Экспертиза үткәреү.*

**2.** *һөйл.* Эксперттарҙан торған комиссия. *Экспертиза ағзаһы.*

**ЭКСПЛУАТАТОР** [*рус.*] *и.* Кешенең хеҙмәт көсөн үҙләштереүсе кеше; иҙеүсе. *Эксплуататорҙар синыфы.*

**ЭКСПЛУАТАЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Етештереү сараларына хосуси милекселек хөкөм һөргән антагонистик синыфлы ижтимағи-экономик формацияла бер кешенең икенсе кеше хеҙмәтен үҙләштереүе. *Совет кешеләренең эксплуатациянан азат хеҙмәте йәмғәт байлығын үҫтереү.., совет кешеһенең тормош хәлен яҡшыртыу сығанағы булып тора.* Башҡорт АССР-ының Конституцияһы, 1984.

**2.** Файҙаланыу маҡсатында нимәнеңдер эшкәртелеше (ер, тәбиғәт байлығына һ. б. ҡарата).

**3.** Ҡорал-ҡорамал, етештереү саралары, йорттоң һ. б. тормошта систематик рәүештә файҙаланылышы. *Эксплуатацияға тапшырыу. Эксплуатацияға биреү.*

**ЭКСПЛУАТАЦИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **эксплуатациялау.**

**ЭКСПЛУАТАЦИЯЛАУ** *ҡ.* **1.** Кемделер эксплуатацияға дусар итеү; иҙеү. *Империализм системаһы .. үҫеш юлына баҫҡан илдәрҙе талау, уларҙы рәхимһеҙ эксплуатациялау иҫәбенә йәшәүен дауам итә.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.

**2.** Файҙаланыу маҡсатында эшкәртеү (ер, тәбиғәт байлыҡтарын һ. б.).

**3.** Ҡорал-ҡорамал, етештереү саралары, йортто һ. б. тейешенсә файҙаланыу. *Машинаны эксплуатациялау.*

**ЭКСПОЗИЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *әҙ.* Әҙәби әҫәрҙең төп сюжеттан алдағы ваҡиғаларҙы һүрәтләгән баш өлөшө. *Романдың экспозицияһы.* / Музыкаль әҫәрҙең төп темаларҙы һүрәтләгән тәүге өлөшө.

**2.** Айырым бер тема буйынса һайлап алынған һәм билдәле бер тәртиптә бирелгән тарихи әйбер, сәнғәт әҫәре һ. б. нәмәләрҙең халыҡҡа күрһәтеү өсөн ҡуйылышы.

**ЭКСПОНАТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Күргәҙмәгә, музейға ҡуйылған йәки ҡуйыласаҡ нәмә. *Күргәҙмә экспонаты. Музей экспонаты.*

**ЭКСПОРТ** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* **1.** Һатыу һәм файҙаланыу өсөн тауарҙың сит илгә сығарылышы;

*кирәһе* импорт. *Экспортҡа китеү. Экспорт өсөн әҙерләү.*

**2.** Сауҙа маҡсатында сит илгә сығарылған тауар һәм уның дөйөм хаҡы йәки күләме.

**ЭКСПОРТЛАУ** *ҡ.* Тауарҙы сит илгә һатырға сығарыу.

**ЭКСПРЕ́СС** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Ҙур станцияларҙа ғына туҡтап бик шәп йөрөгән автобус, поезд, пароход һ. б. *Экспресс автобусы. Экспресс поезы. Экспресс менән ҡайтыу.*

**ЭКСПРЕССИВ** [*рус.* экспрессивный] *с.* Тасуири йәһәттән көслө, тәьҫирле. *Экспрессив телмәр. Экспрессив һүҙ.*

**ЭКСПРЕССИОНИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* 20 быуаттың 30-сы йылдарына тиклем Европа әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендә барлыҡҡа килеп, кешенең эске донъяһын, кисерештәрен сағылдырыуҙы төп бурыс итеп ҡуйған ағым.

**ЭКСПРЕССИОНИ́СТ** [*рус.*] *и.* Экспрессионизм яҡлы кеше.

**ЭКСПРЕ́ССИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ниндәй ҙә булһа тойғо, кисерештәрең булыу, тәьҫир итеү көсө. *Телмәр экспрессияһы.*

**ЭКСПРО́МТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Алдан әҙерләнмәй, ҡапыл ижад ителгән оҫта шиғыр, музыкаль әҫәр, һүҙ һ. б. *Экспромт менән әйтеү.*

**2.** *муз.* Фортепиано өсөн ирекле формала яҙылған бәләкәй генә музыкаль пьеса.

**ЭКСПРОПРИА́ТОР** [*рус.*] *и.* Экспроприация яһаған кеше.

**ЭКСПРОПРИА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** *юр.* Буржуаз хоҡуҡта — милектең хөкүмәт органдары тарафынан тартып алынышы.

**2.** Бер синыфтың икенсе бер синыфты милкенән, ижтимағи хәленән мәхрүм итеүе.

**ЭКСПРОПРИАЦИЯЛАНЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **экспроприациялау.** *Экспроприацияланған хужалыҡ.*

**ЭКСПРОПРИАЦИЯЛАУ** *ҡ.* Экспроприацияға дусар итеү.

**ЭКСТА́З** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ниндәйҙер тойғоға ныҡ бирелеп ярһыған, шашҡан хәл. *Экстазға бирелеү. Экстаз хәлендә булыу.*

**ЭКСТЕНСИВ** [*рус.* экстенсивный] *с.* Сифат яғынан яҡшыртмай, һан яғынан арттырыуға ғына йүнәлтелгән. *Экстенсив хужалыҡ.* ■ *Экономика үҫагыш буйынса, байтаҡ кимәлдә экстенсив нигеҙҙә үҫеүен дауам итте.. Әҙемтә буларак, хеҙмәт етештереүсәнлегенең үҫеш темптары .. етди түбәнәйҙе.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль.

**ЭКСТЕ́РН** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Уҡыу йортонда уҡымаған көйө, үҙ алдына әҙерләнеп, ниндәйҙер курс өсөн имтихан тапшырған кеше. *Экстерн булып институт тамамлау.*

**Э́КСТРА** [*рус.* ⟨*лат.*] *с.* Иң юғары сифатлы, иң яҡшы (тауар сортына ҡарата) *Экстра сәй.*

**ЭКСТРА́КТ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Органик туҡымаларҙан берәй иреткес ярҙамында иреткәндән һуң ҡайнатып һығып алынған матдә. *Ҡарағай ылыҫы экстракты. Женьшень экстракты.*

**2.** Емештән һығып алынған ҡуйы һут. *Еләк экстракты. Сейә экстракты.*

**ЭКСТРЕМИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* Политикала иң киҫкен, ҡәтғи саралар ҡулланыуҙы т[...] лап итеү күренеше.

**ЭКСТРЕМИ́СТ** [*рус.*] *и.* Экстремизмды яҡл[...] ған кеше.

**ЭЛА́СТИК** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Нәҙек рез[...] ептәре булған һуҙылмалы туҡыма (пояс, ба[...] даждар өсөн ҡулланыла).

**2.** Һуҙылыусан йомшаҡ яһалма сүс (ой[...] кеүек нәмәләр бәйләү өсөн ҡулланыла).

**ЭЛАСТИ́К** *с.* Һығылмалы, йомшаҡ. *Эласт[...] туҡыма.*

**ЭЛГЕР** *с. һөйл.* Тиҙ тотоп ала торған, отҡ[...] *Сит илдәргә сығып йөрөгәндә ҡарсығанан элг[...] ир кәрәк* (Халыҡ йырынан).

**ЭЛГЕРСӘК** *и. ҡар.* **элгәс** 1. *Күлдәк элгерсә[...]*

**ЭЛГЕС** *и.* **1.** Кейем элеү өсөн ҡағылған ырғ[...] йәки ырғаҡлы нәмә. *Элгескә элеү.* ■ *Коридор[...] кейем элгестәре ҡағып торған Тайморзин ҡул[...] дағы сүкешен иҙәнгә ырғытты.* М. Тажи.

**2.** *ҡар.* **елкәлек.**

**ЭЛГӘҘӘК** *с. диал. ҡар.* **салт**[2]. *Элгәҙәк ат.*

**ЭЛГӘР** *и.* **1.** Ҡайһылыр өлкәлә кемдәнд[...] алда эшмәкәрлек күрһәткән кеше.

**2.** Бер ергә сәселәсәк иген алдынан сәсел[...] ашлыҡ. *Арыш бойҙай өсөн яҡшы элгәр бул[...] тора.*

**ЭЛГӘРГЕ** *с. ҡар.* **элекке** 1, 2. *Элгәрге й[...] Элгәрге аҙнала. Элгәрге темп менән.*

**ЭЛГӘРЕ** *р.* **1.** *ҡар.* **элек.** *Элек бына уйҙар ба[...] ҡа ине, йыр ҙа башҡа ине элгәре.* Х. Ҡунаҡба[...] *Уҡыу кәрәк беҙгә иң элгәре.* Ғ. Мәсғүт.

**2.** *с. мәғ. һөйл. ҡар.* **элекке** 1. *Элгәре зам[...] Элгәре йыл.*

**ЭЛГӘРТЕН** *р. диал.* Элек.

**ЭЛГӘС** *и.* **1.** Кейемдең түшен ҡаушырып [...] торған бәләкәй ырғаҡ. *Күлдәк элгәсе.* / *ди[...]* Төймә.

**2.** Ырғаҡ рәүешендәге бик. *Ишек элгәсе.*

**ЭЛДЕРЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **элеү** 1—4. *Иҙе[...] элдереү. Бүректе сөйгә элдереү. Ишекте эл[...] реү.*

**ЭЛДЕ-ҺАЛДЫ** *р. диал.* Арлы-бирле. *Эл[...] һалды эшләү.*

**ЭЛЕВА́ТОР** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Игенде ҡаб[...] итеү һәм оҙаҡ һаҡлау өсөн махсус эшлән[...] күпләп тейәү, таҙартыу, киптереү мөмкинлек[...] ре булған ҙур ҡоролма; иген һаҡлағыс. *Элева[...] башняһы. Игенде элеваторға оҙатыу. Элеват[...] ға иген ташыу.* ■ *Игенле йөктәр ҡаплаған [...] ваторҙар юлын.* Р. Ниғмәти.

**2.** Йөк күтәрә һәм бер урындан икенсе уры[...] күсерә, йөрөтә торған ҡулайлама (ғәҙәттә а[...] рым киҫәктәрҙән торған, таралыусан нәмә өсөн ҡулланыла).

**ЭЛЕГАНТ** [*рус.* элегантный ⟨ *фр.*] *с.* Нәф[...] леге менән күҙгә ташланып торған, бик ҡуп[...] һәм килешле. *Элегант костюм.* / Зауыҡ ме[...] кейенгән, үҙен көйәҙ тотҡан. *Элегант кеше.*

**ЭЛЕГАНТЛЫҠ** *и.* Ҡупшылыҡ һәм нәфисл[...] тән килгән матурлыҡ, күркәмлек.

**ЭЛЕГИК** *с.* Элегияға (1 мәғ.) мөнәсәбә[...] *Элегик поэма.*

**ЭЛЕ́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кит.* **1.** Моңло, һағ[...] лы лирик шиғыр.

2. *муз.* Нык һағышлы, моңло йыр йәки музыкаль әҫәр.

**ЭЛЕК** *р.* **1.** Хәҙергс мәлдән күп алда; әүәле. *Элек, революцияға тиклем, ауылда Зариф тигән карт шишмә башына йорт һалып баксасылык менән ғүмер итте.* Б. Бикбай. *Йырсылар торған был ерҙә, сәсәндәр булған элек.* Р. Ниғмәти. / Быға тиклем, бынан алда; башта, әүәл. *Элек ишеткән хәбәр. Элек күргән кеше.* ■ *Ғәләү элек бик йыуаш егет булһа ла, хәҙер батырланып, кыйыуланып китте.* Т. Йәнәби.

2. Билдәле бер вакыттан алда. *Китерҙән аҙна элек. Байрамдан өс көн элек.* ■ *Хаят бынан икеөс йыл элек үткән рәхәт көндәрен хәтерләй.* Һ. Дәүләтшина. **Көн элек** вакытынан алда. *Көн элек килеп етеү.*

3. Кемдән йәки ниҙәндер алда, башта, иң тәүҙә. *Бер битең ай, бер битең көн. Кайһы битең элек тә, Ғәйнифәрхәт, убәйем.* Ш. Бабич. *Йәш, матур һалдат иң элек минең иғтибарымды тарта.* З. Биишева.

4. *бәйл. функцияһында* Сығанак килештәге һүҙҙәрҙән һуң килеп эш-хәрәкәттең кемдән, нимәнән йәки ниндәйҙер эш-хәлдән алда булғанын белдерә. *Йоклап китмәҫтән элек. Ямғырҙан элек.* ■ *Председателдән элек беҙҙең Әмирханов халыкты гыйҙы.* С. Агиш. *Семьянан да элек беҙҙең илгә герой кәрәк.* Ғ. Сәләм.

● *Матурлыктан элек батырлык кәрәк.* Мәкәл. *Элек килгән урын өсөн, аҙак килгән тамак өсөн.* Мәкәл.

**ЭЛЕККЕ** *с.* **1.** Элек булған; үткәндәге, әүәлге. *Элекке заман. Элекке йола. Элекке тормош.* ■ *Элекке заманда ярлы балаларына укыу эше кыйбатка төшә торғайны.* Т. Йәнәби. / Бынан бер көн, бер йыл аша элек; өсөнсө. *Элекке көн.* ■ *Хәлфәләр, байҙар үҙҙәренең элекке йылғы запастары менән йәшәнеләр.* Һ. Дәүләтшина. / Кемдән йәки ниҙәндер алдағы. *Минән элекке бала. Һуғыштан элекке йыл. Революциянан элекке тормош.*

2. Быға тиклемге булған; баштағы, әүәлге. *Элекке һомғоллок. Элекке гәҙәтте ташламау. Элекке эшкә күсеү. Элекке хәлгә кайтыу. // Элеккенән күп матур. Элеккегә карағанда якшырак.* ■ *Элекке дуҫлык .. кабаттан кайтты.* С. Агиш. *Һин һаман да шул элекке, элекке төҫөң.* М. Кәримов. **Элекке кеүек** *кар.* **элеккесә.**

3. Касандыр ниндәйҙер хәлдә булған, ниндәйҙер урын биләгән, йәки ниндәйҙер эш, вазифа һ. б. башкарған (хәҙерге күҙлектән сығып әйтелә). *Элекке артист. Элекке һауынсы.* ■ *[Тайфуров] элекке партизан, зәһәр уҫал бер әҙәм.* М. Тажи.

**ЭЛЕККЕГӨН** *р. һөйл.* Бынан бер көн аша элек; өсөнсө көн.

**ЭЛЕККЕСӘ** *р.* Элек булғанса; әүәлгесә. *Элеккесә йәшәү.* ■ *Заятүләктең күҙҙәре йәнә үҙ урынына ултырып, элеккесә күрә башлай.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ЭЛЕКТР** [*рус.* электричество ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Зарядлы өлөшсәләрҙең хәрәкәтенән, үҙ-ара тәьҫиренән ғибәрәт күренештәр йыйылмаһы. *Электр тураһындағы тәғлимәт.*

2. Халык хужалығында һәм тормошта кулланылған энергия. *Электр көсө. Электр менән һауыу.*

3. Шул энергияны булдырыуға, таратыуға бәйле булғанды күрһәтә. *Электр батареяһы.*

4. Шул энергия көсө менән эшләгәнде күрһәтә. *Электр шәме. Электр быскыһы.* **Электр двигателе** электр энергияһын механик энергияға әйләндерә торған машина. **Электр станцияһы** башка төр энергияны электрға әйләндерә торған предприятие.

5. Шул энергиянан алынған яктылык. *Электр уты. Электр нуры. Электр яктыһы.* ■ *Баш осонда янған электр яктырғандан һаман яктыра.* Ғ. Амантай.

**ЭЛЕ́КТРИК** [*рус.*] *и.* **1.** Электр көсөн хужалыкта файҙаланыу өлкәһендәге белгес. *Электриктар курсы.* ■ *Ғәйнислам ағай колхоздың иң беренсе электригы булды. Ике ауылға яктылыкты ул башлап үткәрҙе.* Х. Назаров.

2. *һөйл. кар.* **электромонтёр.**

**ЭЛЕКТРИ́К** *с.* Электрға мөнәсәбәтле. *Электрик оскон.*

**ЭЛЕКТРИФИКА́ЦИЯ** [*рус.*] *и.* Электр энергияһын төп энергия рәүешендә көнкүрешкә һәм хужалык өлкәләренә индереү эше.

**ЭЛЕКТРИ́ЧКА** [*рус.*] *и.* **1.** Электр көсө менән эшләгән тимер юл.

2. *кар.* **электропоезд.** *Электричка менән эшкә йөрөү.*

**ЭЛЕКТРЛАШТЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **электрлаштырыу.** *Электрлаштырылған тимер юл.* ■ *Ауыл тулыһынса электрлаштырылған, радиолаштырылған.* «Ағиҙел», 1970, № 8.

**ЭЛЕКТРЛАШТЫРЫУ** *к.* Электр көсө менән эшләүгә күсереү; электрификация яһау. *Промышленносты һәм транспортты электрлаштырыу. Ауыл хужалығын электрлаштырыу.*

**ЭЛЕКТРЛЫ** *с.* **1.** Электр үткәрелгән. *Электрлы ауыл.*

2. Электр заряды булдырыуға һәләтле (балыкка карата).

**ЭЛЕКТРОБУ́Р** [*рус.*] *и.* Электр двигателе ярҙамында эшләгән, бик тәрәнгә быраулай торған ер быраулау машинаһы.

**ЭЛЕКТРОВО́З** [*рус.*] *и.* Электр двигателле локомотив. *Электровозлы поезд.*

**ЭЛЕКТРО́Д** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Газ йәки шыйыклык аша ток үткәреү өсөн кулланылған пластинка, сөй, шар һ. б. нәмә рәүешендәге үткәргес. / Установканың нимәнелер электр менән иретеп йәбештергәндә йәки кырккканда ток бирә торған детале.

**ЭЛЕКТРОКА́Р** [*рус.*] *и.* Электр двигателе менән хәрәкәткә килтерелә торған үҙе йөрөмәле еңел йөк арбаһы (складтарҙа, вокзалдарҙа кулланыла).

**ЭЛЕКТРОКАРДИОГРА́ММА** [*рус.*] *и.* Йөрәк тибешенең электрокардиограф эшләгән график яҙылышы. *Электрокардиограмма яһатыу.*

**ЭЛЕКТРОКАРДИО́ГРАФ** [*рус.*] *и.* Йөрәк мускулы эшләгәндә барлыкка килгән электр импульстарын яҙып ала торған прибор.

**ЭЛЕКТРО́ЛИЗ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Электролит һәм уларға батырылған электродтар аша даими ток

үткәндә барлыҡҡа килгән химик процесс. *Электролиз цехы. Электролиз һауы.*

**ЭЛЕКТРОМАГНИ́Т** [*рус.*] *и.* Изоляциялы сым менән уралған һәм шул сым аша ток үткәндә магнитлана торған тимер үҙәк рәүешендәге ҡулайлама.

♦ **Электромагнит ҡыры** *физ.* материяның электр зарядлы өлөшсәләр араһында үҙ-ара тәьҫир итеү күренешен тыуҙырған айырым бер формаһы.

**ЭЛЕКТРОМЕ́ТРИЯ** [*рус.*] *и.* Электрик үлсәү алымы һәм ысулдары.

**ЭЛЕКТРОМЕХАНИК** *с.* Нәмәләргә электр һәм механик юл менән тәьҫир итеүгә нигеҙләнгән. *Металдарҙы электромеханик юл менән эшкәртеү.*

**ЭЛЕКТРОМОНТЁР** [*рус.*] *и.* Электр ҡорамалдарын ҡороу, хеҙмәтләндереү эшен башҡарған квалификациялы эшсе.

**ЭЛЕКТРО́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Матдәнең кире зарядлы иң бәләкәй өлөшсәһе.

**ЭЛЕКТРО́НИКА** [*рус.*] *и.* Электрондарҙың электромагнит ҡыры менән үҙ-ара тәьҫирен өйрәнә торған, шулай уҡ электронлы приборҙар эшләү һәм ҡороу методтары тураһындағы фән.

**ЭЛЕКТРОНЛЫ** *с.* Электрон үҙенсәлектәрен ҡулланыуға бәйле булған, файҙаланыуға нигеҙләнгән. *Электронлы микроскоп. Электронлы ҡорамал. Электронлы сәғәт.*

**ЭЛЕКТРОПО́ЕЗД** [*рус.*] *и.* Электр көсө менән хәрәкәт иткән, тәүге һәм һуңғы вагондарында йөрөтөү өсөн приборҙар ҡуйылған поезд, тимер юл составы.

**ЭЛЕКТРОСВА́РКА** [*рус.*] *и.* Металл ҡорамалдарҙы электр тогы ярҙамында иретеп йәбештереү эше.

**ЭЛЕКТРОСВА́РЩИК** [*рус.*] *и.* Электросварка менән шөғөлләнгән эшсе.

**ЭЛЕКТРОТЕ́ХНИК** [*рус.*] *и.* Электротехника буйынса белгес.

**ЭЛЕКТРОТЕ́ХНИКА** [*рус.*] *и.* Фән һәм техниканың электр, магнит көстәрен төрлө эш өлкәһендә тормошта файҙаланыуға бәйле булған тармағы. *Электротехника промышленносы.*

**ЭЛЕКТРОХИ́МИЯ** [*рус.*] *и.* Физик химияның электрик һәм химик күренештәр араһындағы бәйләнеште өйрәнә торған бүлеге.

**ЭЛЕКТӘН** *р.* Элекке ваҡыттан; күптән. *Электән белеү. Электән таныш кеше. Электән килгән йола.*

**ЭЛЕК-ЭЛЕКТӘН** *р.* Борон замандан; бик күптән. *Элек-электән дуҫ кеше. Элек-электән аралашып йәшәү.* ■ *[Фәхри] элек-электән артыҡ ышанысды кеше түгел ине.* Б. Бикбай.

**ЭЛЕМЕК** *и. диал.* Ләпәкәй.

**ЭЛЕМЕ́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *хим.* Химик тәьҫирҙән башҡа матдәләр составына инә алырлыҡ өлөштәргә тарҡалмай торған ябай матдә. *Радиоактив элемент. Химик элемент.* ■ *Урал тауҙарында фән һәм техникаға билдәле булған бөтә химик элементтар тупланған.* «Ағиҙел», 1969, № 4.

**2.** Бер бөтөн нәмәнең эсенә ингән айырым өлөшсә; берәмек. *Эшсе көстөң ҡиммәте ике элементтан тора — саф физик элемент, тарихи элемент.* / Нимәнеңдер эсендә айырымланып торған, уға билдәле бер үҙенсәлек биргән өлөш. *Спектаклдә халыҡ ижадының элементтары ярылып ята.*

**3.** *күпл.* Бер ижтимағи төркөм вәкиле. *Контрреволюцион элементтар.*

**4.** Химик энергия иҫәбенә бәләкәй миҡдарҙағы электр тогы эшләп сығарған прибор. *Гальваник элемент. Ҡоро элемент.*

**ЭЛЕМЕНТАР** [*рус.* элементарный] *с.* **1.** Төп мәсьәләләргә генә ҡағылған; башланғыс, ябай. *Элементар математика.*

**2.** Сисеүе, аңлауы еңел булған; ауыр түгел, ябай. *Элементар нәмә.* / Үҙенән-үҙе асыҡ, һәр кемгә билдәле булған. *Оло кешегә урын биреү элементар күренеш.*

**3.** *күсм.* Иң кәрәкле, төп. *Элементар шарттар.*

**4.** *физ.* Иң ябай, иң бәләкәй. **Элементар өлөшсәләр** материяның хәҙер билдәле булған иң ваҡ өлөшсәләре (фотон, электрон, позитрон һ. б.). **Элементар электр заряды** тәбиғәттә билдәле булған электр зарядының иң бәләкәйе.

**ЭЛЕМТӘ** *и.* **1.** Үҙ-ара ҡатнашыу, аралашыу мөнәсәбәте; бәйләнеш. *Ауыл менән ҡала араһындағы элемтә. Экономик элемтә. Элемтә тотоу.*

**2.** Алыҫтан хәбәр алышыу, аралашыу ысулы; бәйләнеш. *Элемтә бүлеге. Элемтә саралары. Элемтә булдырыу.*

**3.** Шул бәйләнеште булдырыусы, тәьмин итеүсе учреждениелар йыйылмаһы. *Элемтә бүлеге. Элемтә кадрҙары. Элемтә өлкәһендә эшләүсе йәштәр.* / Хәрби бүлектәр араһындағы бәйләнеш эштәрен башҡарыу менән бәйле хеҙмәт. *Элемтәлә хеҙмәт итеү.*

**ЭЛЕМТӘСЕ** *и.* **1.** Ике арала бәйләнеш тотоусы, хәбәр йөрөтөүсе. *Партизандар отрядының элемтәсеһе. Элемтәсе аша хәтәр итеү.*

**2.** Элемтә эшендәге хеҙмәткәр. *Элемтәселәр курсы.* ■ *Элемтәселәр алғы һыҙыҡҡа кабель һуҙа.* Д. Исламов.

**ЭЛЕНЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* элеү 1—3. *Эленеп тороу. Эленгән нәмә. Эленгән таҡта. Эленгән ҡапҡа.*

**ЭЛЕНКЕ-ҺАЛЫНҠЫ** *с.* Тәнгә ятып тормаған, килешһеҙ (кейем-һалымға ҡарата). *[Таҙ] аҡ сәкмән кейгән, ул да эленке-һалынҡы, ти* (Әкиәттән).

**ЭЛЕНМӘЛЕ** *с. ҡар.* **элмәле.**

**ЭЛЕН-ҺАЛЫН** *и. диал.* Алам-һалам.

**ЭЛЕҮ** *ҡ.* **1.** Нимәнелер берәй ергә аша һалып йәки эләктереп аҫыу. *Ҡоймаға элеү. Бүректе сөйгә элеү. Таҫтамалды киптерергә элеү.* ■ *Колхоз кәнсәһе алдына ҡара таҡта, ҡыҙыл таҡта элеп ҡуйыйыҡ.* М. Тажи. *Һылыу ҡыҙҙар еләк йыя тырыҙдарын элеп беләккә* (Халыҡ йырынан). / Ҡаплау, биҙәү өсөн нимәнелер ҡуйыу. *Тәҙрәгә ҡорма элеү. Шаршау элеү. Стенаға картина элеү.*

**2.** Эләктереү, ҡаптырыу (кейем төймәһенә, элмәгенә ҡарата). *Түште элеү.* ■ *[Айбулат] Ыҫҡынған шинелен ҡымтып, төймәләрен .. элде.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Элгес менән бикләү. *Ҡыҙ, ҡараҡ сығыу менән ишекте элә һалып алды, ти* (Әкиәттән).

**4.** Ниҙеңдер осо менән эләктереү. *Һәнәк менән элеп алыу. Балды элеп ҡабыу.* / Эләктереп кенә

кейеү. Ҡолмәт аяғына иҫке галош элгән килеш йорт-ҡураһын әйләнеп сыҡты. К. Мәргән.

♦ **Ауыҙҙы сөйгә элеү** *ҡар.* **ауыҙ. Элеп алыу** 1) бик етеҙ ҡармап алыу. *Урал [дейеүҙе] ҡапыл элеп алып йән асыуы менән атып бирҙе, ти.* «Урал батыр»; 2) әйткән фекерҙе, һүҙҙе тотоп алыу һәм ҡеүәтләп дауам итеү. *Тәҡдимде ҡыҙҙар элеп алды. Бигерәк тә Яланбикә хупланы.* Һ. Дәүләтшина. **Элеп алып һелкеп һалыу** ныҡ тәнҡитләү, әрләү.

**ЭЛЕҮЛЕ** *с.* **1.** Нимәгәлер элеп, эләктереп, аҫып ҡуйылған. *Элеүле бүрек. Элеүле шаршау.* ■ *Хаммат өрләктә элеүле торған бишле лампаға ут ҡабыҙҙы.* З. Биишева.

**2.** Элгәсе эләктерелгән, бикле. *Элеүле ишек.*

**ЭЛЙЗИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. лингв.* Һуҙынҡы менән башланған һүҙ алдынан тәүге һүҙ аҙағындағы һуҙынҡының төшөп ҡалыуы (мәҫ. «ҡара айыу» тиәһе урынға «ҡарайыу» тип әйтеү).

**ЭЛИКСИР** [*рус.* ⟨ *фр.* ⟨ *ғәр.*] *и.* Үҫемлек туҡымаһынан алынған матдәне спирт, май һ. б. иретеп яһалған шыйыҡса (медицинала, косметикала ҡулланыла). *Теш эликсиры.*

**ЭЛИТА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. йыйн.* **1.** Селекция юлы менән табылған һәм нәҫел өсөн һайлап ҡалдырылған иң яҡшы үҫемлек йәки хайуандар төрө.

**2.** Йәмғиәттең йәки айырым бер төркөмдөң иң яҡшы вәкилдәре.

**ЭЛИТАЛЫ** *с.* Элита (1 мәғ.) булып һаналған, иң яҡшы. *Элиталы мал. Элиталы орлоҡ. Элиталы культуралар.*

**ЭЛКЕ** *и. диал.* Нимәнеңдер иң яҡшыһы, һәйбәте. *Еләктең элкеһе.*

**ЭЛКӘҮ** *ҡ. диал.* **1.** Кейеү (ҡуныслыҙ, элмәкһеҙ аяҡ кейеменә ҡарата). *Аяҡҡа ҡата элкәп алыу.*

**2.** *ҡар.* **элкәштереү.**

**ЭЛКӘШТЕРЕҮ** *ҡ. һөйл.* Унан-бынан эләктереп, арлы-бирле генә ныҡытыу. *[Әхмәҙи] мал һөҙөп ҡолатҡан, һүтелгән кәртәләрен .. элкәштерҙе.* Ж. Кейекбаев.

**ЭЛЛИПС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** *мат.* Бирелгән ике нөктәнән һәр нөктәһенә тиклемге араның суммаһы үҙгәрмәй торған йомоҡ һыҙыҡ; оҙонса түңәрәк.

**2.** Нимәнең дә булһа ошо һыҙыҡҡа оҡшаған контуры, һыҙатланышы.

**ЭЛЛИПСИС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. лингв.* Үҙенән үҙе аңлашыла торған һүҙҙе телмәрҙән төшөрөп ҡалдырыу алымы (мәҫ. ашаған белмәй, тураған белә — «кеше» һүҙе төшөп ҡалған).

**ЭЛЛИПСОИД** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мат.* Эллипс (1 мәғ.) үҙ күсәрҙәренең береһе тирәһендә әйләнгәндә яһалған яҫылыҡ.

**ЭЛЛИПТИК** *с.* Эллипс (1 мәғ.) рәүешендәге. *Эллиптик орбита.*

**ЭЛМӘ**[1]: **элмә теген** элмәкләп сигеү төрө.

**ЭЛМӘ**[2] *и. диал.* Йыла.

**ЭЛМӘЙЕҮ** *ҡ.* Килешһеҙ нәҙек оҙон,ябыҡ булыу (муйынға ҡарата). *[Әсәһе Тимерҙең] элмәйеп торған нәҙек үңәсенә иҫке йөн шәлен урап, башына .. бүрек кейҙерҙе.* Б. Бикбай.

**ЭЛМӘЙЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **элмәйеү.** *Ирҙәре йөрөй асығышып, элмәйешеп, ирҙәрендә ҡайғыһы юҡ, тиер инде* (Бәйеттән).

**ЭЛМӘЙТЕҮ** *ҡ.* Оҙон итеп һуҙыу (ябыҡ, нәҙек муйынды). *[Ҡатын:] Анау Әлекәй тигәндәре бар, шул тәкәтте ҡоротто бит. Муйынын элмәйтеп ала ла, .. аңдый ҙа йөрөй.* Т. Хәйбуллин.

**ЭЛМӘК** *и.* **1.** Бауҙың әйләндереп килтереп эләктергән дүңгәләкле осо; тоҡан. *Ҡороҡ элмәге. Тоҙаҡ элмәге. Элмәк һалыу. Элмәк итеп бәйләү.* ■ *Волганы [дошманға] биреү — илемде икегә бүлеү .., муйынға элмәк кейеү, тигән һүҙ.* Б. Моҡамай. / Ошондай тоҡан еп рәүешендәге, нимәнеңдер һабына беркетелгән ҡулайлама. *Сыбыртҡы һабының элмәге. Саңғы таяғының элмәге өҙөлгән.* ■ *Суҡмарыңдың һабындағы элмәкте беләгеңә кей ҙә, суҡмарҙы яурын өҫтөндә тот.* С. Кулибай.

**2.** Кейемдә төймә, һәҙәпте элә, ҡаптыра торған тишек. *Элмәктәрҙе ҡаптырыу.* / Кейем елкәһендәге элгес; елкәлек. *Буләкәнов пальтоһын .. сөйгә элмәксе булғайны, элмәген өҙҙө.* И. Абдуллин.

**ЭЛМӘКЛӘҮ** *ҡ.* Бауға, епкә элмәк яһау; тоҡанлау. *Элмәкләп бәйләү.*

**ЭЛМӘЛЕ** *с.* Элмәге булған, элеп ҡаптырмалы. *Элмәле лә тундарҙы беҙ киймәнек* (Халыҡ йырынан).

**ЭЛМӘНЛӘҮ** *ҡ.* Тегендә-бында ҡарап эҙләнеү; һемтәнләү. *Элмәнләп йөрөгән ас сүл бүреләре килеп сыға.* Б. Бикбай.

**ЭЛМӘС** *и. диал. ҡар.* **элмәк** 2.

**ЭЛПӘ** *и.* **1.** Организмдағы үтә күренмәле яры; шекәрә. *Мейе элпәһе.*

**2.** *диал.* Үң.

**ЭЛӘГЕТ** *и.* Һынған, ләкин ергә төшмәгән, эләгеп торған ағас йәки ботаҡтар. *Ҡасим әрәмәләге эләгеттәргә башын бәрә-бәрә .. йүгерҙе.* Н. Мусин.

**ЭЛӘГЕҮ** (эләк*ғ*) *ҡ.* **1.** Хәрәкәт ваҡытында нимәгәлер бәрелеп, тейеп, ысҡына алмай тотолоу. *Сөйгә эләгеп йыртылыу.* ■ *Байгужаның аяғына эләгеп, .. һөрлөгөп киттем.* Д. Юлтый. *Урман юлы менән китеп бара икән, юл ситендәге ағасҡа эләгеп, бының [байҙың] күсәре һынып киткән* (Әкиәттән).

**2.** Йәбешеп, ысҡынмай эйәреү. *Эләгеп сығыу. Эләгеп барыу. Аяҡҡа эләгеп ингән суп-сар.*

**3.** Ашанан-ашаға уралыу, салынып тотолоу (бау, арҡан кеүек нәмәләргә ҡарата). *Арҡан эләкте.*

**4.** Аулап тотоу, алыу өсөн ҡуйылған нәмәгә ҡабыу. *Ауға эләгеү. Ҡапҡанға эләгеү. Тоҙаҡҡа эләгеү.* ■ *Ҡояш байыны, балыҡ эләкмәй башланы.* Ф. Иҫәнғолов. / Хуп күрелмәгән эш йәки енәйәт өҫтөндә тотолоу. *Урлашҡанда эләгеү.* ■ *[Гәрәй — Шәүәлигә:] Булған-булған инде, эләктек, хәҙер һыуҙан ҡоро сығыу яғын ҡарар кәрәк.* Б. Бикбай. / *күсм.* Ниндәйҙер күңелһеҙ хәлгә дусар булыу. *Бәләгә эләгеү. Күҙәтеү аҫтына эләгеү.* ■ *Малай өйҙән-өйгә .. йөрөгән сағында урлашып колонияға барып эләккән.* Ф. Әсәнов. *[Бәҙергол] төрлөһөн күрҙе .. Хәтәр мәлдәргә эләкте. Нисектер, имен, иҫән-һау ҡалды.* Ғ. Хөсәйенов.

**5.** Нимәлер ҡулға тап килеү, оҫрау. *Мужиктар .. эләккән бер нәмә менән полисәйҙәргә бәрергә тотонған.* М. Тажи.

**6.** Тапҡыр килеп, тейеү. *Үҙемсә бик тоҫмаллап төрттөм. Әләктеме, юҡмы тип. Һалдауымды ҡалҡытмай торам.* Н. Мусин.

**7.** Берәй эшкә, уҡыуға, урынға һ. б. урынлаша алыу. *Институтҡа әләгеү. Алдынғылар бригадаһына әләгеү.* ■ *[Зиннәт:] Былар мин әйтәм, һыйлы ергә барып әләккәс, тиҙ генә әйләнеп ҡайтмаҫ әле* (Әкиәттән). / Ҡайҙалыр килеп сығыу, көтмәгән урынға тап булыу. *[Сәлмән:] Бәй, Самсон; һин дә бында бит.. Нисек бында килеп әләктең?* Т. Йәнәби.

**8.** Берәй кешенең ҡарамағына инеү, ҡулына төшөү; тейеү. *Бүләк [фронттағы] атайыма әләкһен ине. Кем белә әләгер ҙә [тип уйланы Булат].* К. Кинйәбулатова. *[Ҡыҙ — Әләүкәйгә:] Был минең апайымдың балдағы бит. Ул һиңә нисек килеп әләкте?* (Әкиәттән). / Өлөшкә тура килеү, насип булып тейеү. *Беҙгә бүләк әләкмәй.* ■ *[Ҡотлояр:] Һинең менән миңә уҡыу әләктеме ни? Былай һупалағас та бик ҙур эш.* Һ. Дәүләтшина.

**9.** Тейеү, төшөү (төрлө яза, шелтә, ауыр һүҙ һ. б. ҡарата). *Кеше эшенә ҡыҫылаһың икән, үҙеңә лә әләгеп ҡуйыуы бар.* Ш. Насыров. *Донъя — эт ояһы. Беҙгә байҙарҙан да һәм өйҙә лә бик ныҡ әләгә.* Х. Ҡунаҡбай.

**10.** *күсм.* Йоғоу (ауырыуға ҡарата). *Ябыҡ малға йоғошло ауырыу тиҙ әләгә.* Ф. Төхфәтуллин.

◆ **Ҡулға әләгеү** 1) килеп юлығыу. *[Сабир:] Нимә ҡулға әләгә — бөтәһен дә уҡыйым.* С. Агиш; 2) тотолоу. *[Григорий:] Ҡабат килеп ҡулға әләкмә, әләкһән, үҙеңдән күр.* Һ. Дәүләтшина.

● *Аҫыл ҡош аяғынан әләгә.* Мәҡәл. *Бүренән ҡасҡан айыуға әләккән.* Мәҡәл. *Илдекен урлаған ҡаҙаға әләгер, ҡаҙаға әләкмәһә, яҙаға әләгер.* Мәҡәл. *Йөрөгән аяҡҡа йүрмә әләгә.* Мәҡәл.

**ЭЛӘГЕШЕҮ** *к.* **1.** *урт. ҡар. әләгеү* 1.

**2.** *күсм.* Үҙ-ара әйтешеү, һүҙгә килешеү. *[Һаттал менән Баттал] элекке һымаҡ, әле лә .. үпкәләшеп, әләгешеп китәләр.* И. Ғиззәтуллин.

**ЭЛӘГӘ-ЙЫҒЫЛА** *р.* Бик ашығып, абына-һөрөнә. *Әләгә-йығыла йүгереү.*

**ЭЛӘГӘ-ТӘГӘРӘЙ** *р. һөйл.* Бик ашығып, йығыла яҙып. *Сыуаҡай әбей әләгә-тәгәрәй ишеккә ташланды.* З. Биишева.

**ЭЛӘГӘ-ҺАРҠА** *р. һөйл.* Нимәгәлер ултырып, йә йәйәүләп (юлда барыуға ҡарата әйтелә).

**ЭЛӘГӘ-ҺӘБӘ** *р. диал.* Әләгә-һарҡа.

**ЭЛӘКМӘ** *и.* Бәйләнерлек сәбәп; йәбешке. *Тап көн үҙәгендә комиссар ҡатыны мунса яҡты. Ә ҡайҙан әләкмә табырға белмәй йөрөгән Исламғәле ҡарт .. мейескә һыу һиптерҙе. Шунан .. ыҙғыш китте.* И. Насыри.

**ЭЛӘКСЕН** *с.* Өрөп, ҡаҙалып барыусан.

● *Әләксен эт өрөп бүре алмаҫ.* Мәҡәл.

**ЭЛӘКТЕРЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **әләктереү**. *Әләктерелгән ырғаҡ. Ҡармаҡҡа әләктерелгән балыҡ.*

**ЭЛӘКТЕРЕҮ** *к.* **1.** Хәрәкәт ыңғайында нимәгәлер абайламаҫтан тейеү, бәрелеп төшөрөү, ысҡындырмай үҙең менән эйәртеү һ. б. *Әләктереп йыртыу.* ■ *[Байбисә:] Ана бит салғыйың менән самауырҙың крәнтен әләктереп алып киттең.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Осло, кәкре нәмә менән элеп алыу. *Багор менән әләктереү. Һәнәк менән әләктереү.* ■ *Бығжырмәргән уғы менән әләктереп йыланды ситкә атып ташлай* (Әкиәттән). / Сисергә ҡулайлы итеп еңелсә генә кейеү, ҡатыу (саңғы, аяҡ кейемене ҡарата). *Ҡата әләктереп сығыу.* ■ *Булат саңғыны аяғына әләктереп, иҙәндә .. шыуҙырып ҡараны.* М. Тажи.

**3.** Бау, арҡан кеүек нәмәне нимәгәлер аша-аша салып, уратып алыу. *Бауҙы ырғаҡҡа әләктереү. Бағанаға әләктереп бәйләү.* ■ *Ҡуҙыйкүрпәс ҡороҡ менән [толпарҙы] муйынынан әләктереп тә алды.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**4.** Кейемдең төймәһен, элмәген ҡаптырыу. *Ең төймәһен әләктереү. Яғаның һиҙәбен әләктереү.* / Бик, элгәсте ҡаптырыу, элеү. *Йоҙаҡты әләктереү. Сумаҙандың биген әләктереү.*

**5.** Уратып, ҡарман тотоу. *Беләктән әләктереү. Билдән әләктереү.* ■ *Ул арала булмай, Ғамир теҙгендән әләктереп алды.* Б. Бикбай. *[Сәреү] ҙур ғына таш әләктереп алып, .. Йыһаннурға һелтәне.* Т. Хәйбуллин. *Аҡъял батыр уны [Иргәйелде] һаҡалынан әләктереп алды* (Әкиәттән).

**6.** Һағалап тотоу (йыртҡыс йәнлектәргә ҡарата). *Бесәй тургәй әләктергән.* ■ *[Ҡоштар] алтыһы алты сысҡан әләктереп, кире әйәр башына килеп ҡуналар, ти* (Әкиәттән).

**7.** Аулап, ҡош-йәнлек алыу; тотоу. *Ҡапҡанға әләктереү. Төлкө әләктереү. Ҡуян әләктереү.* ■ *[Бабай] ҡыҙыл балыҡ әләктерергә бик ныҡ дәртләнгән.* Н. Мусин. / Ҡулға алыу, тотоу. *Ҡасҡынды әләктереү.* ■ *[Старшина:] Берәүһен әләктерҙек, инде олоһо ҡалды. Уныһы ла ҡупка бармаҫ.* Т. Хәйбуллин.

**8.** Үҙеңә алыуға ирешеү, ҡулға төшөрөү. *Өлөш әләктереү. Аттың шәбен әләктереү.* ■ *[Сауҙагәр] игенде арзаныраҡ хаҡ менән әләктереп ҡалыу өсөн .. баҙарҙың бер башынан икенсе башына йүгереп йөрөй.* Ғ. Дәүләтшин.

**9.** *һөйл.* Кемгәлер биреү, өлөш сығарыу. *Малға бесәнде мул әләктереү.* ■ *Уны [сентәне] аҫҡа түшәп ебәрҙек. Новиковҡа ла бер мөйөш әләктерҙек.* Д. Юлтый.

**10.** Һуғыу, бәреү. *Сыбыртҡы менән әләктереү.* ■ *Йә, билдәшкәй, шәберәк атла! — тип, Азат һыйырға берҙе әләктереп тә алды.* Ә. Бикчәнтәев. / Һуғып, бәреп тейҙереү. *«Бейәне тотайым тигәндә, тибеп ҡолағыма әләктерҙе», тигән булған Ертыңлар батыр* (Әкиәттән).

**11.** *күсм.* Берәй мәҡәләлә, сығышта тәнҡит итеү, шелтә белдереү һ. б. *Тәнҡиткә әләктереү. Фельетонға әләктереү.*

**12.** *күсм.* Сир, ауырыу кеүек нәмәне йоҡтороу.

**13.** *күсм.* Ишетә һалыу, аңлап тотоп алыу. *Ағайҙың сос ҡолағы шунда уҡ әләктереп алды быны [һүҙҙе].* Б. Бикбай.

**ЭЛӘКТЕРМӘЛЕ** *с. ҡар.* **элмәле.**

**ЭЛӘНГЕ** *и. һөйл.* Солоҡҡа менгәс, баҫып тороу өсөн ҡуйылған ҡулайлама, табалдырыҡ.

**ЭЛӘНГЕС** *и. диал.* Әләнгет.

**ЭЛӘНГЕТ** *и. һөйл.* Ябыҡ, йонсоу кеше. **Әләнгете әйләнеү** ныҡ ябығыу, ҡаҡ һөйәккә ҡалыу.

**ЭЛӘНЛӘҮ** *к. диал.* Әлмәнләү.

**ЭЛӘ-САЛА** *р. һөйл.* **1.** Нисек етте алай, арлы-бирле. *Элә-сала ғына ҡарап сығыу.*

**2.** Асыҡ түгел, яҙа-йоҙа; сала-сарпы. *Элә-сала ғына ишетеп ҡалыу.*

**ЭЛӘҮКӘ** [*рус.* лавка] *и.* **1.** Мунсала менеп ҡыҙыныу, сабыныу өсөн эшләнгән бейек урын. *Эләүкәлә ултырыу.* ■ *Эләүкәгә менеп сабына ғына башлағайным, арттан бер нәмә килеп тотто ла алды.* М. Ғафури.

**2.** *диал.* Һәндерә.

**ЭЛӘ-ҺӨЛӘ** *р. диал. ҡар.* **элә-сала** 2.

**ЭМАЛЛӘҮ** *к.* Эмаль менән ҡаплау. *Һауыт-һабаны эмалләү. Эмалләү цехы.*

**ЭМА́ЛЬ** [рус. ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Металдан яһалған нәмәне туттан һаҡлау һәм сәнғәт әйберҙәрен йылтыратыу өсөн ялатыла торған, үтә күренмәгән, быяла һымаҡ масса; үң. *Эмаль ялатыу.*

**2.** Шул масса менән ҡаплап йылтыратылған сәнғәт әйберҙәре. *Эмалдәр коллекцияһы.*

**3.** Теште өҫкө яҡтан ҡаплап торған йылтыр аҡ төҫтәге матдә; үң.

**ЭМАНСИПА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. кит.* Кемдеңдер бойондороҡло булыуҙан, ирекһеҙ хәлдән, төрлө сикләүҙәрҙән ҡотолоуы; азат булыуы. *Ҡатын-ҡыҙҙар эмансипацияһы. Эмансипация яһау.*

**ЭМБА́РГО** [*рус.* ⟨ *исп.*] *и. юр.* Алтын, валюта, ҡорал, тауар кеүек нәмәләрҙе илгә индереү йәки илдән сығарыуҙың дәүләт тарафынан тыйылыуы. *Эмбарго һалыу.*

**ЭМБЛЕ́МА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Шартлы рәүештә бер мәғәнә билдәһе итеп алынған нәмә йәки һүрәт. *Олимпиада эмблемаһы.* ■ *[Атайым] имән япрағы кеүек эмблема ҡаҙалған .. фуражкаһын кейеп ала.* Н. Мусин.

**ЭМБРИО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Эмбриология буйынса белгес.

**ЭМБРИОЛО́ГИЯ** [*рус.*] *и.* Ҡарындағы яралғы үҫешен тикшерә торған фән.

**ЭМБРИО́Н** [*рус.*] *и.* Ҡарындағы яралғы (иң тәүге осорҙа).

**ЭМЕЙ** *и. бал.* Имсәк.

**ЭМЕҪ** *и. иҫк. ҡар.* **өмөт** 1.

**ЭМИГРА́НТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Үҙ иленән сит илгә күскән кеше. *Эмигрант булыу.*

**ЭМИГРА́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Экономик, политик йәки дини сәбәптәр арҡаһында кешенең үҙ иленән мәжбүри йәки үҙ ирке менән сит илгә күсеүе. *Эмиграцияға китеү.*

**2.** Шул рәүештә күсеп, сит илдә йәшәгән хәл. *Эмиграцияла булыу. Эмиграциянан ҡайтыу.*

**3.** *йыйн.* Эмигранттар. *Францияла ғы рус эмиграцияһы.*

**ЭМИССА́Р** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Рәсми булмаған йәшерен йомош менән башҡа илгә ебәрелгән кеше. *Эмиссар ебәреү.*

**ЭМИ́ССИЯ** [1] [*рус.* ⟨ *лат.*] *и. фин.* Илдең йәки берәй ойошманың ҡиммәтле ҡағыҙ йәки аҡса сығарыуы. *Халыҡ-ара эмиссия. Эмиссия эше.*

**ЭМИ́ССИЯ** [2] [*рус.* ⟨ *лат*] *и. физ.* Ҡаты йәки шыйыҡ есемдәрҙең йылытыуҙан, ток тәьҫиренән һ. б. сәбәптәрҙән газ мөхитенә, вакуумға электрон, иондарҙы бүлеп сығарыуы.

**ЭМ-М** *ымл.* **1.** Әҙерәк уйланып, икеләнеп, әйтә алмай торғанды белдерә. *[Һатыусы:] Туҡта, барлығы күпме була һуң әле? Эм-м..* Б. Бикбай.

**2.** Тәмле, татлы нәмәгә кинәнгәнде белдерә. *[Вәсилә:] Эм-м.., ниндәй тәмле!* С. Агиш.

**ЭМОЦИОНАЛЬ** [*рус.* эмоциональный] *с.* Хис-тойғоға тиҙ бирелеүсән; хиссән. *Эмоциональ кеше.*

**ЭМО́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Кешенең хис-тойғоһо, кисереше һәм шуның сағылышы. *Көслө эмоция. Эмоция менән һөйләү. Эмоцияға бирелеү.*

**ЭМОЦИЯЛЫ** *с.* Хис-тойғоға бай; хисле. *Эмоциялы телмәр.*

**ЭМПИРИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Донъяны өйрәнеүҙә тәжрибә һәм һиҙемде берҙән-бер сығанаҡ тип, ә тәжрибә һөҙөмтәләрен теркәү аңлап белеүҙең төп күрһәткесе тип ҡараған философик йүнәлеш.

**2.** Теорияны баһаламай, практик эшкә, тәжрибәгә иғтибарҙы көсәйтеү күренеше.

**ЭМПИРИОКРИТИЦИ́ЗМ** [*рус.*] *и.* 19 быуат аҙағында, 20 быуат башында философия һәм фән методологияһында барлыҡҡа килгән, Э. Мах, Р. Авенариус һәм уларҙың уҡыусылары тарафынан эшләнгән субъектив-идеалистик ағым; махизм.

**Э́МУ** [*рус.* ⟨ *порт.*] *и.* Австралия дөйәғошо.

**ЭМУ́ЛЬСИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Береһе эсендә икенсеһе иремәй, бөрсөк-бөрсөк булып йөрөгән ике шыйыҡлыҡ ҡатышмаһы. *Йылытҡандан һуң һыуҙың бер өлөшө нефттән айырыла, икенсе өлөшө эмульсия формаһында тороп ҡала.* «Ағиҙел», 1985, № 7.

**ЭМФИЗЕ́МА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Берәй ағзаға, тән туҡымаһына һауа инеү йәки кәрәгенән артыҡ йыйылыу күренеше. *Тире аҫты эмфиземаһы.*

♦ **Үпкә эмфиземаһы** *мед.* үпкәлә һауа күп йыйылыуҙан альвеолар шартлауға килтергән ауырыуҙарҙың дөйөм исеме.

**ЭН** *и. диал.* Өң.

**ЭНАҒАС** *и. диал.* Энәлек, дунала.

**ЭНДОГА́МИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. этногр.* Үҙ ырыуы йәки үҙ ҡатламына ҡараған кеше менән генә өйләнешеү йолаһы.

**ЭНДОКРИНО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Эндокринология буйынса белгес.

**ЭНДОКРИНОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Эске секреция биҙҙәренең төҙөлөшөн һәм эшен тикшерә торған фән.

**ЭНДОТЕРМИК** *с. хим.* Йылылыҡ үҙләштереүгә мөнәсәбәтле. *Эндотермик реакция.*

**ЭНДӘТ** *и. диал.* Киҙеү. *Эндәт тейеү.*

**ЭНЕ** *и.* **1.** Кесе ир туған. *Бер туған эне. Ике туған эне.* ■ *[Егет] әллә ҡайһы ере менән Зәйнәптең яңғыҙ энеһе Әхмәткә оҡшап ҡуя.* һ. Дәүләтшина.

**2.** Йәшкә кесе булған ир заты. *[Әмирханов — Сәлихкә:] Ярҙамлаш, энем, нимә ҡарап тораһың.* С. Агиш.

**ЭНЕКӘШ** *и. ирк. ҡар.* **эне.**

**ЭНЕРГЕ́ТИК** [*рус.*] *и.* Энергетика буйынса белгес, энергетика промышленнoсындағы эшсе. *Баш энергетик. Энергетик булыу.*

**ЭНЕРГЕТИ́К** *с.* Энергияға, энергетикаға мөнәсәбәтле; энергия алыуға һәм файҙаланыуға бәйле. *Энергетик ресурс. Энергетик реактор. Энергетик көрамал. Энергетик ягыулык. Энергетик система.*

**ЭНЕРГЕ́ТИКА** [*рус.*] *и.* Халыҡ хужалығы һәм техниканың төрлө энергия эшләп сығарыу, уны тапшырыу, файҙаланыу эштәре менән шөғөлләнгән тармағы. *Халыҡ хужалығының үҫеше өсөн энергетиканың әһәмиәте ҙур.*

**ЭНЕ́РГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Материяның төп үҙенсәлектәренең береһе: уның төрлө физик процестарҙа (йылылыҡ, яҡтылыҡ, электр, ядро тарҡалышы, гравитация һ. б.) сағылған хәрәкәтенең дөйөм дәүмәле./ Есем һәм матдәнең эш башҡарыу йәки эш башҡарған көскә сығанаҡ булыу һәләте. *Ҡояш энергияһы. Электр энергияһы. Һыу энергияһы.* ■ *20 быуат кешелек донъяһына атом энергияһы бүләк итте.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 16 ғинуар.

**2.** Маҡсатҡа йүнәлтелгән эшкә, хеҙмәткә булған көс. *Йәшлек энергияһы. Энергия күп булыу.* ■ *Үҫә торған организмға күп хәрәкәтләнергә, ҙур энергия түгергә тура килә.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1987, № 7.

**ЭНЕРГИЯЛЫ** *с.* Эшкә теремек, дәртле. *Энергиялы кеше.*

**ЭННӘТ** *и. диал.* Һауһыҙ, сырхау.

**ЭНТОМО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Энтомология буйынса белгес.

**ЭНТОМОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Зоологияның бөжәктәрҙе өйрәнә торған бүлеге.

**ЭНТУЗИА́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Илһам, дәрт. *Энтузиазм менән эшләү.*

**ЭНТУЗИА́СТ** [*рус.*] *и.* Дәртләнеп, энтузиазм менән эш иткән кеше. *Энтузиаст булыу.* ■ *Тәртип һағында тороусы алдынғы энтузиастарға Почёт грамоталары тапшырылды.* «Совет Башҡортостаны», 1973, 7 август./ Берәй эште ныҡ яратҡан, бирелеп эшләгән кеше. *Үҙ эшенең энтузиасы.*

**ЭНЦЕФАЛИ́Т** [*гр.* ⟨ *гр.*] *и. мед.* Баш мейеһе шешеүҙән ғибәрәт ауырыу. *Йоғошло энцефалит. Энцефалит эпидемияһы. Талпан энцефалиты.*

**ЭНЦИКЛОПЕДИК** *с.* **1.** Энциклопедия рәүешендәге, энциклопедия булып һаналған. *Энциклопедик һүҙлек. Энциклопедик йыйынтыҡ.*

**2.** Фәндең төрлө өлкәләренән белешмәһе булған, күп яҡлы. *«Ядкәр» китабының йөкмәткеһе уның авторы М. Өмөтбаевтың энциклопедик белемгә эйә икәнлеген күрһәтә.* З. Шәрки.

**ЭНЦИКЛОПЕДИ́СТ** [*рус.*] *и.* Энциклопедик белемгә эйә кеше; киң белемле кеше.

**ЭНЦИКЛОПЕ́ДИЯ** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Фәндең бөтә өлкәһе йәки айырым бер өлкәһе буйынса тулы мәғлүмәт биргән һүҙлек рәүешендәге ғилми әсбап. *Медицина энциклопедияһы. Әҙәбиәт энциклопедияһы./ күсм.* Берәй мәсьәлә буйынса төшөнсә, мәғлүмәттәр йыйылмаһы. *[Крашенинниковтың] әҫәрҙәрен Башҡортостандың революцияға тиклемге тормошоноң художестволы энциклопедияһы тип атарға мөмкин булыр ине.* «Ағиҙел», 1968, № 4.

**ЭНӘ** *и.* **1.** Үткер осло, бер башы күҙәүле тегенеү ҡоралы. *Бәләкәй энә. Йыуан энә. Нәҙек энә. Машина энәһе. Кейеҙ энәһе. Энә менән сәнсеү. Энә һабаҡлау.* ■ *Яланбикә ағаһының ҡалын көпөһөнә энәһен үткәрә алмай ыҙаланып ҡулына сәнс[те].* Һ. Дәүләтшина./ Төрлө дәүмәлдәге һәм рәүештәге үткер осло тимер ҡоралдарҙың дөйөм исеме. *Патефон энәһе. Укол энәһе./* Бәйләү, үреү өсөн ҡулланылған нәҙек ҡорал. *Ау энәһе. Ҡап энәһе. Селтәр энәһе.* **Ҡамыт энәһе** ҡалын, ҡаты нәмәләрҙе тегә торған йыуан энә. **Биш энә** *йәки* **ойоҡ энәһе** ойоҡ бәйләй торған биш сымдан торған энә. **Шәл энәһе** бер осон төйөнлө итеп, ике оҙон сымдан эшләнгән шәл бәйләү ҡоралы.

**2.** *күсм.* Ҡайһы бер хайуандарҙың сәнскәк ҡаты йөнө. *Терпе энәһе. Энәле тырпайтыу./ һөйл.* Балыҡ ҡанатындағы һөйәк һымаҡ осло үҫенте; сәнске. *Алабуға энәһе./* Ҡайһы бер үҫемлектәрҙәге үткер осло үҫенте; сәнске. *Гөлйемеш сыбығының энәһе.*

**3.** *кар.* **ылыҫ.** *Ҡарағай энәһе. Шыршы энәһе.*

◆ **Энә буры** *диал.* энәғараҡ. **Энәләй нәмәне дөйәләй итеү** *шул уҡ* **төймәләйҙе дөйәләй итеү** (*кар.* **дөйә**). **Энә менән ҡоҙоҡ ҡаҙыу** үтә ҡыйын, ауыр эш тураһында һөйләгәндә сағыштырып әйтелә. **Энә менән тире тунау** *кар.* **тире**[1]. **Энә осондай** бик бәләкәй, саҡ ҡына. *Энә осондай ҙа гәйебем юҡ.* **Энә төртөр урын юҡ** үтә тығыҙ, ҡыҫтау тигән мәғәнәлә әйтелә. **Энәһенән ебенә тиклем** бөтә ваҡлыҡтарына тиклем төпсөп, ентекләп. *Энәһенән ебенә тиклем һорашыу.*

● *Энә үткән ерҙән еп үтә.* Мәҡәл.

**ЭНӘҒАРАҠ** *и.* Нәҙек оҙон кәүҙәле, фырылдап торған дүрт йылтыр ҡанатлы эре бөжәк; безгәләк. *Хушбуй кеүек еҫле үләндәр. Илаһи йән кеүек наҙлы күренә энәғарағы ла күрәндә.* Х. Ғиләжев.

**ЭНӘЛЕК** *и.* **1.** Ҡыҙыл йәки һары емешле, эре энәле ҡыуаҡ ағас; дунала.

**2.** Шул ағастың емеше. *Энәлек һөйәге. Энәлек йыйыу.*

**ЭНӘНӘН-ЕПТӘН: энәнән-ептән сыҡҡан** бер ҙә кейелмәгән; өр-яңы *[Сәхип:] Энәнән-ептән сыҡҡан кейемдәр менән сын яһау итеп, бөтәйтеп ҡайтарғандар улымды.* С. Агиш.

**ЭНӘСӘ**[1] *и.* Бауырһаҡ өсөн таҫма-таҫма итеп теленгән йәки нәҙек кенә итеп йомарланған ҡамыр.

**ЭНӘСӘ**[2] *и. диал.* Сыңғарсай.

**ЭНӘТЕЛ** *и. диал.* Энәлек.

**ЭҢГЕР-МЕҢГЕР** *и. кар.* **эңер.**

**ЭҢГӘК: эңгәк дөйә** инә дөйә.

**ЭҢЕР** *и.* Ҡояш байығас булған ҡараңғылы-яҡтылы мәл. *Эңер ваҡыты. Эңер ҡараңғылығы.* ■ *Эңерҙә генә ямғыр яуып үткәнлектән, юлда саң әҫәре юҡ.* Т. Йәнәби. *Менәм бейек тауҙың баштарына йомшаҡ эңер еле иҫкәндә.* Д. Юлтый. **Ҡыҙыл эңер** ҡояш байып, офоҡ ҡыҙарып торған мәл. *Ҡыҙыл эңәр төшкәс, Ташбатҡан ауылының бер төркөм ҡарты Әхмәҙиҙең урам буйында ятҡан бүрәнәләре өҫтөндә һөйләшеп ултырҙы.* Ж. Кейекбаев./ Шул мәлдәге ҡараңғылыҡ. *Эңер төшөп килә. Әйҙә ҡояш .. офоҡҡа инеп бара.* З. Биишева.

♦ **Ғүмер эңере** ғүмерҙең һуңғы йылдары, ҡартлыҡ көндәре. *Мөбәййәнәне һарыбайсал үҙенең ғүмер эңере яҡынлашҡан көндәрендә .. һылыулығына, саялығына ҡыҙығып алған.* Ғ. Ибраһимов.

**ЭҢЕРГЕ** *с.* Эңер ваҡытындағы. *Эңерге һалҡын.* ■ *[Көнбайышта] ҡан-ҡыҙыл ҡояш эңерге монарға сумып томһаланып ята ине.* З. Биишева.

**ЭҢЕРЛӘТЕҮ** *к.* Эңергә ҡалыу; кисләтеү. *Эңерләтеп юлға сығыу.* ■ *Ығышып ҡына атлап, эңерләтеп кенә ауылға ҡайтып еттек.* Н. Мусин.

**ЭҢЕРЛӘҮ** *к.* **1.** Эңергә һарҡыу; кисләү. *Көн эңерләне, ҡараңғы төшә башланы.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *кар.* **эңерләтеү.** *[Сапый:] Ҡайтып етер, еңерләп ҡайта торған.* Ғ. Шәрипов.

**ЭҢЕРМӘН** *и. диал.* Эңер.

**ЭПИГРА́ММА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Боронғо гректарҙа: йорт, һәйкәл һ. б. нәмәгә аңлатма рәүешендә яҙылған яҙыу.

**2.** Ҡыҫҡа ғына сатирик шиғыр. *Эпиграмма яҙыу.*

**ЭПИ́ГРАФ** [*рус.* ⟨*гр.*] *и.* **1.** Боронғо гректарҙа: һәйкәлгә яҙылған яҙыу.

**2.** *әҙ.* Төп идеяны сағылдырыу маҡсатында әҫәр йәки уның бүлеге алдынан бирелгән ҡыҫҡа һүҙ. *Эпиграф биреү.*

**ЭПИГРА́ФИКА** [*рус.*] *и.* Тарих фәненең металл, таш, төрлө һауыт һ. б.-ға яҙылған яҙыуҙарҙы өйрәнә торған тармағы.

**ЭПИДЕМИК** *с.* Эпидемияға мөнәсәбәтле; йоғошло. *Эпидемик ауырыу.*

**ЭПИДЕМИО́ЛОГ** [*рус.*] *и.* Эпидемиология буйынса белгес.

**ЭПИДЕМИОЛО́ГИЯ** [*рус.*] *и.* Медицинаның йоғошло сирҙәрҙең килеп сығыу, таралыу сәбәптәрен һәм уға ҡаршы көрәш юлдарын өйрәнгән бүлеге.

**ЭПИДЕ́МИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Йоғошло ауырыуҙың киң таралышы. *Грипп эпидемияһы. Тиф эпидемияһы. Ваба эпидемияһы.*

**ЭПИЗО́Д** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кит.* **1.** Тормошта булған берәй хәл, ваҡиға. *Күҙ алдынан .. тыныс тормош йылдарының күңелле эпизодтары үтеп китә.* Ә. Ихсан.

**2.** Әҫәрҙең, фильмдың һ. б. тамамланған үҙ аллы бер өлөшө. *Экрандан беҙ һуғыш эпизодтарын ҡараныҡ. Беҙҙең күҙ алдыбыҙҙан.. танкылар, самолёттар шаулап үтте.* Й. Солтанов.

**ЭПИЗОДИК** *с.* **1.** Айырым бер ваҡытта ғына булған, системалы рәүештә булмаған, ваҡытлы. *Эпизодик ярҙам. Эпизодик эш. Эпизодик рәүештә тикшереп тороу.*

**2.** Айырым урындарҙа ҡыҫҡа ваҡытҡа ғына күренгән, икенсе дәрәжәләге, осраҡлы. *Эпизодик образ. Эпизодик роль.*

**ЭПИЗОО́ТИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Йоғошло мал ауырыуының киң таралыш алыуы.

**ЭПИК** *с.* Эпосҡа мөнәсәбәтле. *Эпик жанр. Эпик стиль.* ■ *Күберәк эпик пландағы әҫәрҙәр яҙмышы менән ҡыҙыҡһындым.* К. Мәргән./ Эпос рәүешендәге. *Эпик әҫәр. Эпик ҡомартҡы.* ■ *18 быуаттағы башҡорт халыҡ йырҙарының шаҡтай ҙур өлөшө тарихи йөкмәткеле эпик йырҙарҙан торған.* С. Галин.

**ЭПИКЛЫҠ** *и.* Эпосҡа хас үҙенсәлек һәм сифат. *Күп планлы эпик романдың телендә лә эпиклыҡ булырға тейеш.* Ә. Вәли.

**ЭПИЛЕ́ПСИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кар.* **быума.**

**ЭПИЛЕ́ПТИК** [*рус.*] *и. һөйл.* Быумалы кеше.

**ЭПИЛО́Г** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Әҙәби әҫәрҙең төп геройҙарҙың һуңғы яҙмышын ҡыҫҡаса хикәйәләгән аҙаҡҡы өлөшө. / *муз.* Операның һуңғы өлөшө.

**ЭПИСТОЛЯР** [*рус.* эпистолярный ⟨ *гр.*] *с.* **1.** Хат рәүешендәге (әҙәби әҫәргә ҡарата). *Эпистоляр роман.*

**2.** Кемдеңдер хаттары йыйылмаһынан торған. *Яҙыусының эпистоляр мираҫы.*

**ЭПИТА́ФИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ҡәбер ташына яҙылған яҙыу (күберәк шиғыр формаһында була). / Кемдеңдер вафат булыуына бәйләп яҙылған әҫәр. *Художестволы әҙәбиәт өсөн күберәк ироник эпитафиялар хас.* К. Әхмәтйәнов.

**ЭПИ́ТЕТ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Үҙенсәлекле бер яғын асыҡ, тәьҫирле итеп һүрәтләү өсөн ниҙеңдер исеменә ҡушып әйтелгән һүҙ. *Мөхәббәт шиғырҙарында төрки халыҡтар поэтикаһы өсөн уртаҡ булған традицион эпитет һәм сағыштырыуҙар ныҡлы урын алған.* Ә. Харисов./ Кем йәки нимәнелер ҡылыҡһырлап, берәй сифатына баҫым яһап әйтелгән һүҙ. *Бер кисәлә бер таныштыр маҡтанылар, ниндәй генә эпитеттар таҡманылар.* М. Кәримов.

**ЭПИЦЕ́НТР** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ер йөҙөндә ҙур хараба килтергән емергес көстөң тап үҙәгенә тура килгән өлкә, урын. *Ер тетрәүҙең эпицентры.*

**ЭПОКСИД** [*рус.* эпоксидный ⟨ *гр.*]: **эпоксид ыҫмала** синтетик ыҫмала (келәй, лак, пластиктар эшләү өсөн ҡулланыла). *Торбаны эпоксид ыҫмала менән эшкәртеү.*

**ЭПОЛЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Революцияға тиклемге Россия һәм ҡайһы бер сит илдәр ғәскәрендә: офицерҙарҙың уҡа суҡлы погоны. *Эполетлы мундир.* ■ *Бүҙәкәев кантон эполеты ҡояш нурҙарында ялтырай* (Халыҡ йырынан).

**ЭПОПЕ́Я** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Боронғо поэзияның һүрәтләгән ваҡиғалары буйынса яҡын булып, бөтөн бер тарихи хикәйәгә әйләнеп киткән йырҙар, ҡобайырҙар, хикәйәттәр циклы./ Киң тарихи осорҙо, ҙур ваҡиғаларҙы эсенә алған әҙәби әҫәр. *Поэтик эпопея.*

**2.** Халыҡ тормошонда ҙур әһәмиәткә эйә булған ҡатмарлы тарихи ваҡиға. *Бөйөк Ватан һуғышы эпопеяһы.*

**Э́ПОС** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Хикәйәләп яҙылған әҙәби әҫәрҙәр төрө.

**2.** Айырым бер халыҡтың бер осорға ҡараған ваҡиғаларҙы сағылдырған героик йыр, поэма, хикәйәләр йыйылмаһы; ҡобайыр. *«Урал батыр" эпосы.* ■ *«Бабсаҡ менән Күсәк» эпосы башҡа эпик ҡомартҡыларҙан ныҡ ҡына айырылып тора.* М. Сәғитов.

**ЭПО́ХА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. кар.* **дәүер** 1.

**Э́РА** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Ниндәйҙер мәлдән, ваҡиғанан башланып киткән йыл иҫәбе һәм йыл

иҫәбенең билдәле бер системаһы. **Мосолман эраһы** Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең Мәккәнән Мәҙинәгә ҡасҡан көнөнән башлана. **Яңы (***йәки* **беҙҙең) эра** Ғайса пәйғәмбәр тыуған тип һаналған көндән башлана.

**2.** Үҙенсәлекле тарихи ҙур ваҡыт арауығы; осор, дәүер.

**3.** *геол.* Тау тоҡомдарының геологик төркөмдәре барлыҡҡа килгән ваҡыт арауығы; осор, дәүер. *Ерҙең бөтә үткән тарихын геологтар биш эраға: археозой, протерозой, палеозой, мезозой һәм кайнозой эраларына бүләләр.* Д. Бураҡаев.

**ЭРБЕТ** *и.* Тубырсығында ашауға яраҡлы сәтләүеге булған эре ылыҫлы ағас; кедр. *Эрбет сәтләүеге.*

**ЭРГӘ** *и.* **1.** Кем йәки нимәнеңдер уң йәки һул яғы; ҡабырға яҡ. *Өй эргәһендәге баҡса. Эргәләге ауыл. Эргәлә тороу. Эргәнән атлау. Эргәгә ултырыу.* ■ *Эргәһендә ултырған рус ҡыҙы унан: — Фатима, ниңә ашамайһың?..— тине.* Б. Бикбай./ Кем йәки нимәнеңдер торған ере, уға яҡын булған урын, тирә; ян. *Ятам тирмәмдә. Туғандарым, яҡындарым менең эргәмдә.* Салауат Юлаев. *[Зөлхизә:] Килсе, мырҙам, кил эргәмә, бер һүҙекәй әйтәм үҙеңә.* Н. Иҙелбай.

**2.** 3-сө зат әйл. ф. һәм төб., у.-в. клш аффикстары менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*ҡар.* **эргәһендә, эргәһенә**).

♦ **Эргә юрған** *ҡар.* **юрған.**

**ЭРГӘЗЕМБАЙ** *и. диал.* Умырзая.

**ЭРГӘЛЕК** *и. ҡар.* **буйлыҡ** 2.

**ЭРГӘЛӘТЕҮ** *к.* Нимәнеңдер эргәһенән буйлатыу. *Урман эргәләтеп юл һалыу. Ҡойма эргәләтеп ағас ултыртыу.*

**ЭРГӘЛӘҮ** *к.* Ниҙеңдер эргәһенән буйлау. *Өй эргәләп барыу.* ■ *Таш юлдан өҙлөкһөҙ обоздар, санитар арбалары, артиллериялар үтә. Уларҙы эргәләп .. һалдат колонналары килә.* Д. Юлтый.

**ЭРГӘЛӘШ** *с.* Бер-береһенә яҡын; ҡабырғалаш. *Эргәләш ауылдар. Эргәләш булыу. // Эргәләш тороу. Эргәләш тура килеү.* ■ *Эргәләш ике ҡала араһын көн дә бер тапҡыр автобус урай.* Д. Исламов.

**ЭРГӘҺЕНДӘ** *бәйл. функцияһында* Төп килештәге исемдәрҙән һуң килеп кем йәки нимәнеңдер ҡарамағында булғанды белдерә. *Үҙ туғандары эргәһендә булыу. Ата-әсә эргәһендә йәшәү. Институт эргәһендә асылған курс.* ■ *Ауыл клубы эргәһендә стена газетаһы сығарырға .. кәрәк.* М. Тажи.

**ЭРГӘҺЕНӘ** *бәйл. функцияһында* Төп килештәге исемдәрҙән һуң килеп эш-хәрәкәттең кемгә йәки нимәгә төбәлгәнен, йүнәлтелгәнен белдерә. *Дуҫтар эргәһенә һыйыныу.* ■ *Мөмкин тиклем кейендем дә Зөләйха эргәһенә киттем.* Т. Йәнәби. *Беҙ Новиковтың Аликсакин эргәһенә саҡырылыуын .. көтә башланыҡ.* Д. Юлтый.

**ЭРЕ** *с.* **1.** Күләм-дәүмәле ҙур берәмектәрҙән торған; *киреһе* ваҡ. *Эре ком. Эре бойҙай. Эре тоҙ. Эре күҙле ямғыр. Эре булыу.* ■ *Көҙ көнө Сәлмән баҡсанан быйма башындай эре картуф йыйып, тауҙай итеп өйөп ҡуйҙы, ти* (Экиәттән).

**2.** Ҙур аралы; киң. *Эре аҙым. // Эре-эре атлау.*

**3.** Буй-һыны ҙур булған; *киреһе* ваҡ. *Эре ағас. Эре балыҡ. Эре себен.* ■ *Көтөү эше еңел түгел ине. Баярҙың береһенән-береһе үҫал, йөҙләгән эре һыйырын .. таң ҡараңғыһынан тороп, яланға ҡыуырға кәрәк.* Һ. Дәүләтшина. **Эре һөйәкле** киң, ныҡ кәүҙәле. *Рәүфә эрерәк һөйәкле булғанға күрә үҙ тиҫтерҙәренә ҡарағанда еткәнерәк күренә.* Ә. Вәли.

**4.** Милке, мөлкәте, составы ҙур булған. *Эре колхоз. Эре хужалыҡ.* / Халҡы күп булған; ҙур. *Эре-эре отрядтар. Эре ҡалаларҙан торған өлкә.*

**5.** Ҡиммәте, баһаһы ҙур (аҡсаға ҡарата). *Эре аҡса.*/ *һөйл.* Йөкмәткеһе, әһәмиәте ҙур булған. *[Атайым] ҡыш көндәрендә эрерәк эш табалмағанда .. сабата үрә торғайны.* Т. Йәнәби.

**6.** *күсм.* Үҙен башҡаларҙан өҫтөн һанаған; һауалы. *Эре кеше. // Эре һөйләшеү. Эре генә иҫәнләшеү.*

♦ **Он эреһе** *диал. ҡар.* **көрпә** [1] **1. Эре мал** ат һәм һыйырҙар. **Эренән һалдырыу** маҡтаныу, маһайыу. **Эре сирттереү** *ҡар.* **сирттереү. Эре ярҙырыу** *шул уҡ* **эре сирттереү.** (*ҡар.* **сирттереү**).

**ЭРЕЛЕ-ВАҠЛЫ** *с.* Бер тигеҙ генә түгел, төрлө ҙурлыҡтағы. *Эреле-ваҡлы еләк. Эреле-ваҡлы өйҙәр.* ■ *Беҙ — эреле-ваҡлы дүрт малай — әсәй тәрбиәһендә үҫтек.* Ш. Насыров.

**ЭРЕЛЕК** [1] *и.* **1.** Ниҙеңдер күләм-дәүмәл яғынан эре булыу сифаты, ҙурлығы. *Картуфтың эрелеге.*

**2.** *күсм.* Үҙеңде өҫтөн һиҙеү тойғоһо һәм шунан килгән һауалы ҡараш. *Һин студент саҡта ябай инең, ҡайҙан килде шундай эрелек?* Ғ. Дәүләтов.

**ЭРЕЛЕК** [2] *и. диал. ҡар.* **көрпә** [2] 1.

**ЭРЕЛӘНДЕРЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **эреләндереү** 1. *Эреләндерелгән хужалыҡ.*

**ЭРЕЛӘНДЕРЕҮ** *к.* **1.** Бергә туплап милкен арттырыу, состав яғынан ҙурайтыу; эреләтеү. *Колхоздарҙы эреләндереү.* ■ *«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» әҫәренең нигеҙендә .. башҡорт ырыуҙарын эреләндереү, уларҙың үҙ-ара берләшеү мотивтары ята.* С. Галин.

**2.** *күсм.* Эрелек тойғоһо уятыу; маһайтыу.

**ЭРЕЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Дәүмәле артыу, эрегә әйләнеү; ҙурайыу. *Эреләнгән еләк.* ■ *Ҡара саңы әйләнеп ятҡан урамдар ҡаҙ үләненә, эреләнеп үҫкән алабутаға әйләнгән.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Бергә тупланып, милке, составы яғынан артыу; ҙурайыу. *Эреләнгән хужалыҡ.*

**3.** *күсм.* Үҙеңде өҫтөн күреү; маһайыу. *Һылыу ҙа инде хәҙер хур ҡыҙы булып алғас, эреләнеп киткәндер.* Т. Йәнәби.

**ЭРЕЛӘТЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **эреләтеү.** *Эреләтелгән колхоз.* ■ *[Председатель:] Фермалар эреләтелә бит. Һеҙҙе ҙурырағына мөдир итеп күсерергә иҫәп бар.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1974, № 2.

**ЭРЕЛӘТЕҮ** *к.* **1.** Бергә туплап милкен арттырыу, состав яғынан үҫтереү; ҙурайтыу. *Ауылдарҙы эреләтеү. Райондарҙы эреләтеү.* ■ *Башҡортостанды волостар буйынса районлаштырғанда Административ комиссия, 1923 йылда,*

*был волостарҙы эреләтеп, бөтәһе 103 волость ҡалдырҙы.* Р. Ҡузыев.

**2.** Ҡиммәте, баһаһы ҙурға алыштырыу (аҡса, заём кеүек нәмәләрҙе). *Аҡсаны эреләтеү.*

**ЭРЕ-МАР** *и. йыйн.* Төрлө эре үлән. *Эре-мар сабыу.*

**ЭРЕМЕК** *с.* **1.** Эрегән һымағыраҡ. *Эремек һөт.*

**2.** Эрегән, төйөрләнгән һымағыраҡ. *Эремек дебет.*

**ЭРЕМЕКЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** Эрегән һымағыраҡ булыу. *Ваҡытында сабылған йәп-йәшел бесән, көнөнә унар ҡаҙаҡ һоло ашатып һауған бейәләрҙең ҡышҡы һөтө һыйыр һөтөләй ҡуйы, бәләкәс кенә эремекләнеп тора.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Төйөрләнгән һымағыраҡ булыу. *Эремекләнгән дебет.*

**ЭРЕМСЕК** *и.* Һөттө эретеп алған аҙыҡ. *Эремсек һыуы. Эремсек бәрәмесе. Эремсек эретеү. Эремсек баҫыу.* **Ҡыҙыл эремсек** эрегән һөттө ҡыҙарғанса ҡайнатып яһаған эремсек. *Ҡыҙыл эремсек ҡайнатыу.*

**ЭРЕМСЕКЛӘНЕҮ** *ҡ.* Эремсек төйөрҙәре барлыҡҡа килеү, төйөрләнеү. *Эремсекләнеп тороу. Эремсекләнеп ойоу.*

**ЭРЕН** *и.* Шешкән урынға йыйылған йәшкелт һары, насар еҫле ҡуйы шыйыҡлыҡ. *Эрен йыйыу.* / Күҙ төбөнә йыйылған аҡһыл һары нәмә.

**ЭРЕНЛЕ** *с.* Эрене булған, эрен йыйған. *Эренле күҙ. Эренле шешек.*

**ЭРЕНЛӘҮ** *ҡ.* Эренлегә әйләнеү, эренле булыу. *Йәрәхәт эренләй башланы.* ■ *Яралыларҙың өҫтәре бысраҡ, биттәре керле, күҙҙәре эренләгән.* А. Таһиров.

**ЭРЕТЕҮ** *ҡ.* Ҡайнар һөткә әҙ генә ҡатыҡ һалып, эремсеккә әйләндереү, эремсек итеү. *Һөт(тө) эретеү.*/ Ҡымыҙҙы тейешенсә бешеп тормай төйөрләндереү.

**ЭРЕ-ТОРО** *с.* Берәмектәре тейешле дәүмәлдән эре, төрлө ҙурлыҡта булған. *Эре-торо икмәк киҫәктәре. Эре-торо утын ярҡалары. Эре-торо итеп киҫеү.*/ *күсм.* Тәпсирләп эшләүҙе талап итмәгән. *Әлегәсә Муллағәли бабай .. эре-торо эш менән булыша ине. Ә был шкаф һынлы шкафҡа беренсе тотоноуы.* Р. Солтангәрәев.

**ЭРЕҮ** *ҡ.* **1.** Ҡайнаған сағында ҡатыҡ һалғандан йәки әсегән көйө ҡайнатҡандан эремсеккә әйләнеү (һөткә ҡарата)./ Тейешенсә бешмәгәндән төйөрләнеү (ҡымыҙға ҡарата). *Туй башы һаран булһа, .. һаумалы эрегән булыр* (Туй йырынан).

**2.** Бөрсөк-бөрсөк булып төйөрләнеү (дебеткә ҡарата).

**ЭРЕШ** [*рус.* режь, режа] *и. диал.* Ау анаһы (*ҡар.* **ана** [3]).

**ЭРЕШКЕ** *и. диал. ҡар.* **рәшә** [1] 1.

**ЭРЗИНКӘ** [*рус.* резинка] *и.* **1.** *һөйл.* Резинка. *Эрзинкә бәй.*

**2.** *диал.* Калуш.

**ЭРЗЯ** [*рус.*] *и.* Мордва халҡының бер этник төркөмө һәм шул төркөмдөң бер кешеһе. *Эрзя ҡыҙы. Эрзя теле.*

**ЭРИГӘ** [*рус.* рига] *и. диал.* Ҡайыҡлы ырҙын.

**ЭРИТРОЦИТ** [*рус.* ‹ *гр.*] *и. физиол.* Тән туҡымаларына кислород килтереүсе, гемоглобинға бай ҡыҙыл ҡан күҙәнәге; ҡыҙыл ҡан бөртөксәһе.

**ЭРКЕЛДЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Һауыттың ситенән ашҡанса, ташҡанса тултырыу. *Эркелдереп ҡымыҙ ҡойоу.*

**2.** Күпләп бер яҡҡа хәрәкәт иттереү, ағылдырыу. *Байҙар малдарын эркелдереп, йәйләүгә күскән.* Ж. Кейекбаев.

**ЭРКЕЛЕҮ** [1] *ҡ.* **1.** Бер ыңғайҙан күп булып бер ергә йыйылыу, тулышыу. *Йөрәккә ҡан эркелде.* ■ *[Биктимерҙең] күҙенә йәш эркелде. Тамағына .. төйөн килеп тығылды.* Ф. Исәнғолов. *Тамырҙарға, әйтерһең, ҡан түгел, ҡан урынына ялҡын эркелә.* Р. Ғарипов. *Ямғыр яуғандан бире туңдырмай, ҡар аҫтында һыу эркелеп ята.* «Ағиҙел», 1971, № 3./ Күп булып, тулышып аша бәреү, бәреп сығыу. *Тауҙарҙан ел килде, һыу өҫтө тулҡынып ярҙарға эркелде.* М. Ғәли. *Урал гына тауын урләгәндә эркелеп-эркелеп аға ҡар һыуы* (Халыҡ йырынан)./ *күсм.* Тулышып тышҡа бәреү (хис-тойғоға ҡарата). *Уйҙар аға, уйҙар эркелә.* Я. Ҡолмой. *Ҡыҙ мөхәббәттән эркелеп торған күҙҙәрен Ҡасимға төбәне.* Н. Мусин.

**2.** Күмәк булып бергә йыйылыу, өйкөлөшөү, тупланыу. *Эркелеп көтөү ҡайта. Эркелеп йөрөгән балыҡ.* ■ *Халыҡ шахта ауыҙына эркелде.* Т. Хәйбуллин. *Оло гына юлдан саң күтәреп, эркелеп тә килгән яу бугай* (Халыҡ йырынан). / Өйкөм-өйкөм булып бергә йыйылыу. *Эркелеп болот аға.* ■ *Нурулла быуа өҫтөнән эркелеп күтәрелгән томанға .. ҡарап торҙо.* Ш. Янбаев.

**ЭРКЕЛЕҮ** [2] *ҡ. диал.* Артылыу.

**ЭРКЕЛЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **эркелеү** [1]. *Күҙ йәштәре эркелешеп тора. Малдар эркелешеп һыуға төшө.* ■ *Уралып ятҡан Уралда .. сыйырсыҡтай эркелешеп .. күсә йөрөп йәйләгән һылыу-һылыу ҡыҙҙар бар* (Ҡобайырҙан).

**ЭРКЕЛТЕҮ** *ҡ. ҡар.* **эркелдереү.** *[Һомай] ҡош-ҡорттарҙы әйәртеп, үҙ артынан эркелтеп, тағы Уралға киткән, ти.* «Урал батыр».

**ЭРКЕМ** *и. диал.* Күләүек.

**ЭРКЕТ** *и.* **1.** Йыйылған әсе ҡатыҡ (ғәҙәттә унан ҡорот ҡайнаталар). *Эркет һыуы. Эркет йыйыу. Эркет ҡайнатыу.* ■ *[Фатима] һыйыр һауыуҙан, ойотҡан ойотоуҙан һөм эркет ҡайнатып ҡорот яһауҙан .. бушаманы.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *диал.* Турта.

**ЭРКЕТЕҮ** *ҡ. диал.* Эркелдереү. *Дейеүҙәрҙе өҫкөттөң, ер өҫтөндә эркеттең.* «Урал батыр».

**ЭРКЕТЛӘНЕҮ** *ҡ.* Ныҡ әсеп, эркеткә әйләнеү. *[Саттарҙың] ҡатығы хәҙер ҡатыҡ түгел, эркетләнгән инде.* С. Ҡудаш.

**ЭРКЕТЛӘҮ** *ҡ.* Эркет (1 мәғ.) һөртөү. *[Хәбирә инәй] еҙ ҡомғандарҙы эркетләп таҙартып, йылы һыу ҡойған.* Т. Килмөхәмәтов.

**ЭРКЕҮ** [1] *ҡ.* Эркелеү.

**ЭРКЕҮ** [2] *и.* **1.** Балыҡ көтөүе. *Сабаҡ эркеүе менән йөрөй.*

**2.** *диал.* Өйөр. *Бүре эркеүе.*

**ЭРКЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **эркеү** [1].

**ЭРКӘТӘҮ** *и.* Солоҡ балын алғанда күнәкте бәйләп төшөрә торған бау.

**ЭРЛӘҮ** *ҡ. диал. ҡар.* **иләү** [2].

**ЭРО́ЗИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** *геол.* Ел, һыу һ. б. нәмә тәьҫирендә Ер өҫтөнөң боҙолоуы. *Тупраҡ эрозияһы. Эрозияға ҡаршы көрәш.* ■ *Беҙҙә һәр йылды бер гектар һөрөнтө ерҙән һыу һәм ел эрозияһы менән 10—50 тонна тупраҡ ағып йәки елгә осоп китә.* В. Ғнрфанов.

**2.** *тех.* Металдың төрлө тәьҫир арҡаһында тыштан боҙолоуы.

**3.** *мед.* Тәндең бөтәү яра булып боҙолоу күренеше.

**ЭРОТИ́ЗМ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Енси хискә артыҡ ныҡ бирелгәнлек.

**ЭРО́ТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Енси хис тәьҫирендә булыу күренеше.

**ЭРПЕ** *и.* Эремсекләнеп ойошҡан киҫәк, төйөр. *Әсегән ҡымыҙҙың эрпеһен яҙыу ауыр була.* М. Ғөбәйҙуллин.

**ЭРУДИ́Т** [*рус.*] *и.* Тәрән белемле, эрудицияла кеше.

**ЭРУДИ́ЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ҡайһылыр өлкәләге күп яҡлы тәрән белем. *Иҫке багаж, иҫке эрудиция менән генә халыҡ талабына яуап бирерлек әҫәр яҙып булмай.* Ә. Харис.

**ЭРУДИЦИЯЛЫ** *с.* Киң, тәрән белемле. *Эрудициялы кеше.*

**ЭРӘЙЕҮ** *к. диал. ҡар.* **эреләнеү** 3.

**ЭРӘҮКӘ** *с. диал.* Рәүкә.

**ЭС** *и.* **1.** Кәүҙәнең күкрәктән түбәнге өлөшө; ҡорһаҡ. *Ҙур эс. Эсте кәпәйтеү. Эсте һыйпау.* ■ *Ҡулды эскә килтерәм. Ул нимә менәндер тығыҙ итеп бәйләнгән.* С. Агиш. *Ул урындыкта аунарға, эсен ыуырға кереште.* М. Ғафури. / Аш үҙләштереү, аш һеңдереү ағзалары һәм улар урынлашҡан урын. *Эс ауырыуы. Эс ауыртыу. Эскә ярамау. Эсте имгәтеү.* ■ *Асыҡҡан эсенең өҙөлөп ауыртҡанын да тойманы.. Байрас.* З. Биишева. **Эс ҡатыу** ҡатыулау. **Эс китеү** эс боҙолоу, оло ярау шыйыҡланыу. *Һалдаттар асыкты, .. өлгөрмәгән картуф ашайҙар. Шул арҡала эс китеү башланды.* Д. Юлтый. **Эс китмәһе** эс китеүҙән ғибәрәт ауырыу. *[Хәбибә:] Баяр эшендә .. ҡайҙа ул бала ҡарау. Меҫкен Зиннәтем эс китмәһенән үлде.* Б. Бикбай. **Эскә тейеү** нимәлер ярамай эсте боҙоу, эсте китәреү. *[Әлхәм:] Ике кило виноград ашағайным. Ул ҡәһәрең, эскә тейә икән.* С. Кулибай. **Эс ҡатыу** оло яраү ҡаты хәлгә килеү; ҡатыулау. *Эс ҡатып ауырыу.* **Эс(те)китәреү** *ҡар.* **эскә тейеү. Эс төшөү** эс-ҡарын түбәнәйеп ауырыу. *[Сәйҙеямал:] Әллә ауыр күтәреп, эсем төшөп күйҙы инде.* Я. Хамматов.

**2.** Тәндең тыштан күренмәгән эске ағзалар урынлашҡан өлөшө. *Тынды эскә тартыу.* ■ *Ҡымыҙ акрынлап ҡына эсте йылытып, бөтә тамырҙарға йүгерә.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** *күсм.* Хис-тойғо тупланған фарази урын; күңел. *Эс сере.* ■ *Бибикамал еңгә асыулы һүҙҙәрен әйтмәне. Вакыты килеп еткәс, әйтермен әле, тип, эсендә һаклап ҡалдырҙы.* А. Карнай. *Эскенәйем тулы ҡайғы-хәсрәт, бер йырламай, йөрәгем баҫылмай* (Халыҡ йырынан).

**4.** Ниҙеңдер уртаһындағы ҡыуыш урын һәм уның уратылышы. *Ауыҙ эсе. Торба эсе. Һауыт эсе. Ҙур эсле һауыт.* // *Эс яҡ.* ■ *Ҡолҡай ҡурайының эсенә өрөп алған да уйнап та ебәргән.* Н. Иҙелбай. / Ҡоролма уртаһындағы арауыҡ, ҡоролманың уртаһы. *Кәртә эсе. Һарай эсе.* ■ *Ҡараңғы төн тәҙрәләрҙән эскә ҡараны.* Ғ. Сәләм. / Ҡатлы нәмәнең араһы. *Китап эсенә һалыу.* ■ *Ике йөҙ дана дәфтәр, .. һәммәһенең эсендә киптергес бар.* М. Тажи.

**5.** Уратып алған нәмәнең араһы йәки урталығы. *Болот эсе. Һыу эсе. Урман эсе.* ■ *Зариф ҡалҡыулыҡты икегә бүлеп һуҙылған ҡул эсендәге юлға төштө.* Ә. Харисов. *Күҙәтселәр хәбәр бирҙе: «Саң күрҙек, тип, саң эсендә бер талай йән күрҙек»,— тип.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**6.** Ниҙеңдер өҙәге һәм уны тәшкил иткән матдә. *Ҡауын эсе. Ҡәләм эсе. Эсе серек ағас.*

**7.** Йөҙгә тиҫкәре яҡ. *Эсе шыма ҡағыҙ. Йөнтәҫ эсле буҫтау. Эсен тышҡа әйләндереү.* / Кейем-һалымдың тәнгә яткан өлөшө, эске ҡаты. *Пальтоның эсен яңыртыу. Эсе сатин юрған. Һырыған эсле бүрек.*

**8.** 3-сө зат *эйл. ф.* һәм төб., у.-в., сығн. кл. аффикстары менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*ҡар.* **эсендә, эсенә, эсенән** [2]).

♦ **Ҡара эсле** насар уйлы, эскерле. **Өй эсе** 1) өйҙәге нәмә; ҡаралды. *Өй эсе ялт итеп тора;* 2) бер өйҙә бергә торған бөтә кеше; ғаилә. *Өй эсе менән килеү.* ■ *Бөтә өй эсе еңеү байрамы үткәрҙе.* Д. Юлтый. **Тар эсле** *шул уҡ* **тар күңелле** (ҡар. **күңел** 3). **Хәл эсендә** *шул уҡ* **хәл өҫтөндә** (*ҡар.* **хәл** [1]). **Эс ауырыуы** кешене мыҫҡыллап, кәмһетеп әйтелә. *[Шәмсиә:] Көнләштермәк була инде был тилекәй .. Эй, эс ауырыуы.* З. Биишева. **Эс бошоу** *ҡар.* **бошоу. Эс бушау** *ҡар.* **бушау** [1]. **Эсендәге тышында** уй-кисерештәрен йәшермәгән асыҡ күңелле кешегә ҡарата әйтелә. *Бер генә йәшерен уйы ла юҡ уның [таныштың]. Эсендәге тышында.* Ф. Иҫәнғолов. **Эсе ярылғыр** әрләгәндә, ҡарғағанда әйтелә. **Эс кере** *ҡар.* **кер** [1] 2. **Эс күтәрләү** (*йәки* **күмһеү**) көнсөләктән әрнеү. *Төрлө кеше бар шул әле был донъяла. Берәүҙең бәхетенә берәү ҡыуана, икенсеһенең эсе күмһей.* Н. Мусин. **Эскә йылы инеү** *ҡар.* **йылы** [1]. **Эскә һыймау** хис-тойғоно йәшерә алмау. *Бойҙайҙы күргәс, Хәсби апайҙың шатлығы эсенә һыймаңы.* Т. Йәнәби. **Эс ҡайышыу** (*йәки* **көйөү**) *шул уҡ* **йән ҡайышыу** (*ҡар.* **йән**). **Эс ҡатып** (*йәки* **тырнап**) **көлөү** *ҡар.* **көлөү. Эс ҡыҙыу** *шул уҡ* **күҙ ҡыҙыу** (*ҡар.* **күҙ**). **Эс ҡырылыу** күңел әрнеү, болоҡһоу. *Бойҙай баҫыуының уталып бөтмәгәнен күргәс, Ишбулдының тағы эсе ҡырылды.* Ә. Вәли. **Эс өҙөлөү** кем өсөндөр әрнеү; өҙгәләнеү. *Һинең өсөн өҙөлә эсем көнөн-кисен.* Ш. Бабич. **Эс тартыу** алдан һиҙенеп шикләнеү. **Эс(те) ҡатырыу** ныҡ көлдөрөү. *[Мөнирә] ҡыҙыҡ хәбәрҙәр һөйләп, эсте ҡатыра.* Ш. Янбаев. **Эсте ҡатыу алыу** талаҡты сәнсеп алыу. *Эсте ҡатыу алғансы йүгереү.* **Эсте ҡырыу** тынысһыҙлап борсоу, йөрәкте өйкәү. *[Шофер:] Бына түйгә ҡоро ҡул менән барыу эсте ҡыра.* Н. Нәжми. **Эсте тишмәҫ** *ҡар.* **тишеү. Эстә [ас] бүре олоу** ныҡ асығыу. *Асыҡтырған, эстә бүре олой.* А. Карнай. **Эс үткәшеү** *ҡар.* **үткәшеү. Эс һеңдереү** ашағандан һуң йөрөп, аш һеңдереү. **Эс һыҙыу** (*йәки* **эрнеү, яныу**) нимә өсөндөр көйөү, ҡайғырыу. *Уйлаған да уйым*

*ай юк кеүек, эскенәйем яна ут кеүек* (Халыҡ йырынан).

**ЭС-БАУЫР** *и. йыйн.* **1.** Аш бешереүгә бәйле эске ағзалар; үпкә-бауыр.

**2.** *күсм.* Хис-тойғо тупланған фарази урын. *[Шәфәҡ:] Өс йыл буйы көтә-көтә эс-бауырҙарым көйөп бөттө инде.* М. Кәрим.

◆ **Эс-бауырға инеү** кешене йыйы һүҙ менән әүрәтеп, үҙ яғына ауҙарыу. *[Аҙнагол] эс-бауырыңа инеп килә. Бер ҡарауҙа һине иретеп, ҡамырҙан йомшаҡ яһап, ҡул ҡаушыртып ҡуя.* З. Биишева. **Эс-бауыр өҙөлөү** ныҡ әрнеү, эсенеү. *Кем балаһы өсөн кем илаһын, эс-бауыр-ҡайҙары өҙөлөп* (Халыҡ йырынан).

**ЭСЕЛЕҮ** *к. төш. ҡар.* **эсеү** 1. *Эселеп бөтмәгән һурпа.*

**ЭСЕМЛЕК** *и.* Эсеү өсөн махсус әҙерләнгән нәмә. *Алкоголһеҙ эсемлек. Иҫерткес эсемлек.*

**ЭСЕНДӘ** *бәйл. функцияһында* **1.** Төп килештәге һүҙҙәрҙән һуң килеп, ҡайҙа, ниндәй урында, кем йәки нимәләр араһында, уратылышында, солғанышында булғанды белдерә. *Һуғыш эсендә булыу.* ■ *[Хасбулаттың өйө] тотош муйыл сәскәһе эсендә ултыр[а].* З. Биишева. *[Һынсы ҡарт:] Бына ҡарағыҙ, сабырға киткән аттар эсендә бер толпар бар, уның аяҡ туҙаны күккә олғашты* (Әкиәттән)./ Ниндәйҙер хәл, кисереш тәьҫирендә, шауҡымында булғанды белдерә. *Тынлыҡ эсендә ҡалыу. Шатлыҡ эсендә йәшәү.* ■ *Шау-шыу, ыҙғыш-талаш эсендә эшләгән хеҙмәтсегә еңел тип бирәү ҙә әйтмәҫ.* Т. Йәнәби. *Шомло уй эсендә оҙаҡ ҡалғы килмәне.* Д. Юлтый.

**2.** Төп килештәге ваҡыт төшөнсәле һүҙҙәр менән килеп, эш-хәлдең билдәле бер ваҡыт арауығында булғанын белдерә. *Бер йыл эсендә 2 курс тамамлау. Өс көн эсендә урап ҡайтыу.* ■ *[Тимер] ун йыл эсендә ауылына икенсе тапҡыр ғына ҡайта.* Б. Бикбай. **Ғүмер эсендә** *һөйл.* бөтә ғүмер буйына. *Ғүмер эсендә бер курортҡа барҙым.*

**ЭСЕНЕҮ** *к.* **1.** *һөйл.* Ниҙер эсеп һыуһын ҡандырыу.

**2.** *диал.* Ашаныу. *[Ғөләйшә:] Әйҙә, улым, һал өҫтөңдө, икәүләп эсенеп алайыҡ.* К. Кинйәбулатова.

**ЭСЕНӘ** *бәйл. функцияһында* Төп килештәге һүҙҙәрҙән һуң килеп, эш-хәрәкәттең ҡайҙа, нимәләр араһына, ниндәй солғанышҡа йүнәлтелгәнен белдерә. *Йәшеллек эсенә сумыу. Көл эсенә күмеү. Ыҙғыш эсенә килеп инеү.* ■ *Уттың ялмауыҙ оҙон телдәре һә тигәнсе бер нисә кварталды ҡурҡыныслы ҡосағы эсенә алды.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЭСЕНӘН** [1] *р. ҡар.* **эстән** 1. *Ғәләү .. эсенән генә союзға ҙур ышаныс белдереп ҡуйҙы.* Т. Йәнәби.

**ЭСЕНӘН** [2] *бәйл. функцияһында* Төп килештәге һүҙҙәрҙән һуң килеп, һүҙ алып барылған объекттың ҡайҙан, ниндәй урындан кем йәки нимәләр араһынан булғанын белдерә. *Халыҡ эсенән сыҡҡан әҙип.* ■ *Яуыз дошман яуы эсенән атым алып сыҡтым аҡланға.* Салауат Юлаев. *Ай эсенән күңелемә дарман булырлыҡ йән ҡарайым.* Ш. Бабич. / Кейгән кейемдең ҡатлап, нимәнеңдер аҫтынан кейелгәнен белдерә. *Пальто эсенән кофта кейеү.* ■ *Иҫкерәк шиблит эсенән быҫраҡ сылғау урап, социалистмын тип йөрөйһөң ҡып-ҡыҙыл билбау урап.* Ш. Бабич.

◆ **Ауыҙ эсенән** ҡысҡырып әйтмәй, эстән генә. *Ауыҙ эсенән мығырлау.* **Танау эсенән** танау аша. *Ғәләү .. тауышын уға [Ҡорбановка] оҡшатып, танау эсенән һыңғырлап һөйләнә.* Б. Бикбай.

**ЭСЁР** [*рус.*] *и.* Россияла ваҡ буржуазия файҙаһын ҡайғыртҡан буржуаз-демократик партия һәм шул партияның бер ағзаһы. *Һул эсерҙар. Уң эсерҙар.*

**ЭСЕРГЕ** *и. диал. ҡар.* **ҡыҙылса** [2].

**ЭСЕРГЕС** *и.,* **һыу эсергес** Мал эсерә торған автоматик ҡорал.

**ЭСЕРЕҮ** *к.* **1.** Эсергә биреү. *Һыу эсереү. Ҡымыҙ эсереү. Сәй эсереү. Һөт эсереү.* ■ *Медсестра балаға укол яһаны, дарыу эсерҙе.* М. Тажи.

**2.** Иҫерткес эсемлек менән һыйлау. *Ҡунаҡты эсереү.*

**3.** Малды һыуға ҡушыу; һуғарыу. *Ат эсереү.* ■ *Бейәләрҙе йылғаға төшөрҙөләр, димләй-димләй эсерҙеләр.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЭСЕРӘНКЕ** *с. диал.* Кәгез. *Эсерәнке мал.*

**ЭСЕ-ТЫШЫ** *и. йыйн.* Эске һәм тышҡы яғы. *Эсе-тышы йылтыр тауар. Эсе-тышы атлас юрған.*

**ЭСЕҮ** *к.* **1.** Шыйыҡ нәмәне йотоу. *Һыу эсеү. Эсеп ебәреү. Һемереп эсеү. Сынаяҡтан эсеү. Эске килеү.* ■ *[Ғарифуллин] һыуынған сәйен күтәреп эсте лә, сынаяғын шаҡ иттереп өҫтәлгә ултыртты.* С. Агиш./ Шыйыҡ аҙыҡты тамаҡҡа алыу; ашау. *Аҡ эсеү. Өйрә эсеү.*/ Һыу сығанағы итеп файҙаланыу; һыулау. *Йылғанан эсеү. Шишмәнән эсеү.* ■ *Илдең ҡайһы һыуын эстең икән?* М. Хәй./ *күсм.* Эскә алыу; йотоу. *Һауа саф, еҫкәп, эсеп туйғыһыҙ.* Ғ. Дәүләтшин. *Ер йотлоғоп ҡояш нурын эсә.* Р. Бикбаев.

**2.** Иҫерткес эсемлек ҡабул итеү. *Эсеп иҫереү.* ■ *Беҙ ул көндө бөтә донъяны онотторҡ. Аҡылдан шашып эстек.* Д. Юлтый. *Эскән саҡта аҡыл дәрттең ҡоло була.* Ҡ. Даян./ Иҫерткес эсемлеккә әүәҫләнеү. *Эсә башлау. Эсеп йөрөү.* ■ *[Сабир мулла:] Ишетеүемә ҡарағанда, .. Нәнкир бик эсеүгә һалышҡан икән.* Б. Ишемғол.

**3.** *күсм.* Берәй хәлгә дусар булып баштан үткәреү, кисереү. *Күп ҡайғы эстем.* ■ *Беҙҙең өсөн шулай хәсрәт эсеп, [эсә] йөҙҙәренә һары ҡойолған.* М. Харис.

◆ **Ҡан эсеү** *ҡар.* **ҡан. Хәл эсеү** ял итеү. **Һонолоп һыу ҙа эсмәү** эш менән ватылмай, ҡәҙерле булып, рәхәт йәшәү. **Һыу кеүек эсеү** *ҡар.* **һыу. Һыу эскеһеҙ итеп** бик ныҡ, иҫәнгерәткәнсе (туҡмау).

● *Ауыҙы бешкән һыуыҡ һыуҙы ла өрөп эскән.* Мәҡәл.

**ЭСКА́ДРА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Хәрби диңгеҙ флотындағы караптарҙың ҙур берекмәһе.

**2.** Беренсе һәм икенсе донъя һуғышы ваҡытында ҡайһы бер илдәрҙәге хәрби самолёттарҙың ҙур берекмәһе. *Истребителдәр эскадраһы.*

**ЭСКАДРИ́ЛЬЯ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Самолёттарҙың бер нисә звеноһын эсенә алған хәрби берәмек. *Эскадрилья командиры.*

**ЭСКАДРО́Н** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Кавалерияның ротаға тап килгән берәмеге. *Эскадрондарға бүлеү.* ■ *Эскадрон командирҙары һалдаттарға аттан төшөргә һәм йәһәт кенә оборонаға ятырға приказ бирҙе.* Ә. Ихсан.

**ЭСКАЛА́ТОР** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и.* Кешеләрҙе мендереү, төшөрөү өсөн ҡулланылған, бер туҡтауһыҙ хәрәкәттә булған баҫҡыс. *Эскалатор менән менеү.* ■ *Эскалатор алып төшә ер аҫтына, һалҡын һарайға.* Ғ. Сәләм.

**ЭСКАЛА́ЦИЯ** [*рус.* 〈 *ингл.*] *и. кит.* Ниҙеңдер барған һайын киңәйеүе, көсәйеүе йәки көсәйтелеше. *Хәрби әҙерлек эскалацияһы. Һуғыш эскалацияһы.*

**ЭСКЕ** [1] *и.* **1.** Иҫерткес эсемлек эсеүҙән ғибәрәт күренеш. *Эске мәжлесе.* ■ *Килгән-киткән ысынлап та ишәйҙе.. Тора-бара эшләһе лә эшһеҙе лә йыйыла башланы. Эске китте.* Я. Вәлиев.

**2.** Иҫерткес эсемлеккә булған самаһыҙ әүәҫлек; эскелек, эскеселек. *Эскегә бирелеү. Эскегә һалышыу. Эскегә ҡаршы көрәш.*

**ЭСКЕ** [2] *с.* **1.** Ниҙеңдер эсендә, уртаһында урынлашҡан; *киреһе* тышҡы. *Ағастың эске ҡатламы.* ■ *Ер шарының эске төҙөлөшөн тикшереү яңы башлана әле.* Д. Бураҡаев./ Алғы пландан төпкәрәк урынлашкан, төптәге. *Эске бүлмә. Эске ишек. Эске тәҙрә.*

**2.** Эс яҡтағы, эстәге. *Эске күлдәк. Эске кеҫә.* ■ *Мунсаға килгәс, [Гәрәйҙең] тәүге эше — эске бер ҡат кейемен .. тиҙ генә йыуып алыу булды.* Б. Бикбай./ Йөҙгә ҡаршы яҡтағы. *Тауарҙың эске яғы.*

**3.** Тән, кәүҙә эсендәге. *Эске ағзалар. Эске тамырҙар.*

**4.** Кешенең рухи донъяһына ҡараған, күңеле менән бәйле булған. *Эске кисереш. Эске хыял. Эске ҡәнәғәтлек менән.* ■ *Сәхнәлә геройҙың эске донъяһын .. тәрәнерәк асырға мөмкин булыр ине.* Ғ. Рамазанов.

**5.** Нимәнең дә булһа нигеҙен, асылын тәшкил иткән. *Атомдың эске көсө. Һүҙҙең эске мәғәнәһе. Есемдең эске энергияһы.*

**6.** Айырым ил, йәмғиәт йәки төркөм эсендәге тормошҡа, эшмәкәрлеккә бәйле. *Эске дошман. Эске заем.*

**ЭСКЕЛЕК** *и.* Иҫерткес эсемлеккә булған самаһыҙ әүәҫлек, эске. *Эскелеккә бирелеү. Эскелеккә һалышыу.*

**ЭСКЕРЛЕ** *с.* Яман уй-ниәтле, аҫтыртын уҫал. *Эскерле кеше. Эскерле булыу.* ■ *Ғәләү эскерле түгел. Ул алсаҡ, ҡояш кеүек йылмайып тора.* Б. Бикбай.

**ЭСКЕРЛЕЛЕК** *и.* Эскерле булыу сифаты.

**ЭСКЕРҺЕҘ** *с.* Яман уй-ниәтһеҙ, саф күңелле. *Эскерһеҙ бала. Эскерһеҙ булыу.*

**ЭСКЕРҺЕҘЛЕК** *и.* Эскерһеҙ булыу сифаты. *Балаға хас эскерһеҙлек.*

**ЭСКЕСЕ** *с.* Иҫерткес эсемлек эсеүгә әүәҫ. *Эскесе булып китеү.* ■ *Эскесе кеше үҙен генә түгел, бөтә ғаиләһен .. ғәриплэй, бәхәтһеҙ итә.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 21 апрель.

**ЭСКЕСЕЛЕК** *и.* Иҫерткес эсемлеккә булған самаһыҙ әүәҫлек; алкоголизм.

**ЭСКИБИҘӘР** [*рус.* скипидар] *и. һөйл.* Скипидар.

**ЭСКИ́З** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* **1.** Һүрәттең төп һыҙаттарын күрһәткән тәүге һыҙмаһы. *Эскиз төшөрөү.* ■ *[Сәғиҙә] күҙгә тәбиғәт күренештәренән бер нисә эскиз һыҙып та алды.* М. Тажи./ Әҙәби йәки музыкаль әҫәрҙең төп фекерҙе билдәләгән тәүге яҙмаһы. *Хикәйәнең эскизы. Операның эскизы.*

**2.** Ҡарап эшләү, күсереү өсөн хеҙмәт иткән һүрәт. *Декорация эскизы. Милли костюмдар эскизы.*

**ЭСКИМО́** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Шоколад менән көпләнгән туңдырма.

**ЭСКИМО́С** *и.* Чукотка ярымутрауы яр буйҙарында, Американың төньяҡ яр буйында, Гренландияла йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе (палеоазиат төркөмөнә ингән телдәрҙең береһендә һөйләшә). *Эскимос халкы. Эскимос ҡатыны. Эскимос теле.*

**ЭСКО́РТ** [*рус.* 〈 *фр.*] *и.* Кем йәки нимәнелер оҙатып барған хәрби һаҡ. *Мотоциклистар эскорты. Эскорт менән оҙатыу.*

**ЭСКУ́ДО** [*рус.* 〈 *исп.*] *и.* Португалия, Мозамбик һ. б. ҡайһы бер илдәрҙең аҡса берәмеге.

**ЭСКӘ** *р.* Төпкә, ниҙеңдер эсенә табан. *Эскә үтеү. Эскә инеп ултырған өй.*

**ЭСКӘМЙӘ** [*рус.* скамья] *и.* **1.** Бер нисә кеше ултырырлыҡ итеп оҙонса таҡтанан аяҡлап яһалған ҡулайлама. *Артлы эскәмйә. Киң эскәмйә.* ■ *Сәхибә ҡапҡа алдындағы эскәмйәгә сығып ултырҙы.* Ғ. Хәйри.

**2.** *диал.* Ҙурат.

◆ **Суд эскәмйәһе** суд ваҡытында хөкөмгә тартылыусылар ултыра торған урын. **Суд эскәмйәһенә эләгеү** хөкөмгә тартылыу.

**ЭСКӘРГЕ** *с. диал. ҡар.* **эске**[2] 1. *Эскәрге бүлмә.*

**ЭСКӘРЕ** *р. һөйл.* Эскә табан, эскә. *Эскәре үтеү.*

**ЭСКӘТЕР** [*рус.* скатерть] *и.* Өҫтәл ябыуы, ашъяулыҡ.

**ЭСҠАҪТАЛ** *с. диал.* Аҫтыртын, яуыз. *Эсҡаҫтал кеше.*

**ЭС-ҠАРЫН** *и. йыйн.* Һуйған малдың ҡарын һәм эсәктәре; эсәк-ҡарын. *Эс-ҡарын бешереү.*

**ЭСЛЕ** *с.* **1.** Эске ҡатлы, эске ҡаты булған. *Эсле балаҫ. Эсле кейеҙ.* ■ *Эсле лә тышлы бәрән тун эсәйемә булһын минән һуң* (Сеңләүҙән).

**2.** *диал.* Һыйышлы. *Эсле һауыт.*

**ЭСЛЕК** *и.* **1.** Кейем-ҡаралдының эске ҡаты; эс. *Алынмалы эслек. Бишмәттең эслеге. Костюмдың эслеге туҙған.*

**2.** *с. мәғ.* Кейем-ҡаралдының эске ҡаты өсөн тәғәйенле. *Эслек тауар.*

**ЭСЛЕ-ТЫШЛЫ** *с.* **1.** Эске һәм тышҡы ҡатлы. *Эсле-тышлы тун.*

**2.** Эске һәм тышҡы яҡтан. *Эсле-тышлы һыланған өй.*

**ЭСЛӘТЕҮ** [1] *к. йөкм. ҡар.* **эсләү**[1]. *Бишмәтте эсләтеү.*

**ЭСЛӘТЕҮ** [2] *к. ҡар.* **эсләү**[2]. *Булат .. урман эсләтеп оҙаҡ ҡына барғандан һуң бер аҡланга сыҡты.* К. Мәргән.

**ЭСЛӘҮ**[1] *к.* Эслек ҡуйыу. *Эсләп килдәк теп-терәү.*

**ЭСЛӘҮ**[2] *к.* Ниҙеңдер эсенән буйлау. *Соҡор эсләп барыу.* ■ *Батыршалар урман эсләп бер-ике саҡырым ситкә китә.* Ғ. Хөсәйенов.

**ЭСМИНЕЦ** [*рус.*] *и.* Эскадралағы миноносец.

**ЭСМӘЛЕК**[1] *и.* Эсергә яраҡлы һыу сығанағы. *Томбойоҡло тәрән күл, эсмәлегем булған күл* (Халыҡ йырынан).

**ЭСМӘЛЕК**[2] *и.* Һалдағы кәшмәктәрҙе ҡабырғанан бер-береһенә тоташтырған бүрәнә.

**ЭСМӘҮ** *и. диал.* Билбау.

**ЭСПАДРО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. спорт* Фехтованиеға өйрәнгәндә ҡулланыла торған ҡылыс төрө.

**ЭСПА́НДЕР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* Физик күнегеүҙәр яһағанда мускулдарға көс төшөрөү өсөн ҡулланылған спорт әйбере.

**ЭСПЕРА́НТО** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Европала киң таралған телдәр нигеҙендә эшләнгән халыҡ-ара яһалма тел. *Эсперантоны өйрәнеү.*

**ЭССЕ́** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. әҙ.* Әҙәбиәткә, философияға, социаль темаға бәйле проблемаларҙы ғилми системаға һалмай, ирекле рәүештә биргән очерк.

**ЭССЕ́НЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Ниндәй ҙә булһа тиҙ осоусан матдәнең ҡуйыртылған иретмәһе (аҙыҡ промышленносында, фармакологияла һәм парфюмерияла ҡулланыла). *Емеш-еләк эссенцияһы. Уксус эссенцияһы.*

**ЭСТАКА́ДА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Юл аша сығыу, пароход туҡталыу, йөк бушатыу һ. б. кәрәк өсөн хеҙмәт иткән күпер һымаҡ ҡоролма. *Эстакада транспортеры. Юлды эстакада аша үткәреү.*

**ЭСТА́МП** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Һүрәттең художниктың баҫма эшенән йәки гравюранан ҡағыҙға төшөрөлгән күсермәһе.

**ЭСТАФЕ́ТА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Хәбәр ташыусыларҙың берен-бере алыштырыу юлы менән йөрөтөлгән элекке почта.

**2.** Йүгереү, йөҙөү һ. б. спорт алыштары буйынса, билдәле урында шартлы бер нәмә тапшырып, үҙ-ара алышыныу тәртибенә ҡоролған команда ярышы. *Эстафета ярышы. Эстафета уҙғарыу. Эстафетала ҡатнашыу. Өс километрлы эстафетаға старт алынды.* / Шул ярышта ҡулдан-ҡулға тапшырылған шартлы нәмә. *Эстафетаны алыу. Эстафетаны биреү.*

**3.** *күсм.* Дауам ителергә тейеш эш. *Бала — беҙҙең яҡты киләсәктең гәҙәттән тыш хаҡлы вариҫы, беҙҙең ҡулдан эстафета алып, дауам итеүсе ул тарихты.* Ш. Бикҡол.

**ЭСТЕ́Т** [*рус.*] *и.* **1.** Сәнғәткә күңел биргән, матурлыҡты, нәфислекте яратҡан кеше.

**2.** Эстетлыҡ (2 мәғ.) яҡлы кеше.

**ЭСТЕТИ́ЗМ** [*рус.*] *и. ҡар.* **эстетлыҡ.**

**ЭСТЕТИК** *с.* **1.** Эстетикаға (1 мәғ.) мөнәсәбәтле. *Эстетик категория. Эстетик теория.*

**2.** Сәнғәт һәм тормошта матурлыҡ менән нәфислекте булдырыу һәм тоя белеүгә мөнәсәбәтле. *Эстетик тәрбиә.* ■ *Һәр замандың үҙенең эстетик талаптары, эстетик аң .. формалары, төрҙәре бар.* М. Минһажетдинов. *Әҙәби түңәрәктәрҙең маҡсаты .. йәш быуында эстетик тойғо, матурлыҡты һөйөү хисе тәрбиәләү.* Р. Бикбаев.

**ЭСТЕ́ТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Матурлыҡ төшөнсәһе һәм уның сәнғәт, әҙәбиәт һәм тормоштағы сағылышы тураһындағы философик тәғлимәт. *Марксистик эстетика.*

**2.** Кемдеңдер сәнғәткә булған ҡараштар системаһы. *Пушкин эстетикаһы.*

**3.** Ниҙеңдер матурлығы, нәфислеге. *Махсус эш кейемдәре менән тәьмин итеү .. хеҙмәт эстетикаһының бер элементы.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 19 июнь.

**ЭСТЕТЛЫҠ** *и.* **1.** Нәфислек, матурлыҡҡа булған ынтылыш.

**2.** Сәнғәттә эске йөкмәткенән бигерәк тышҡы матурлыҡҡа форманың камиллығына иғтибар биреү күренеше; сәнғәттәге формализм.

**ЭСТОН** *и.* Эстонияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (уғыр-фин төркөмөнә ингән телдәрҙең береһендә һөйләшә). *Эстон халҡы. Эстон ҡатыны. Эстон теле.*

**ЭСТОНСА** *р.* **1.** Эстон телендә. *Эстонса һөйләшеү.*

**2.** Эстон халҡына хас, эстондар кеүек. *Эстонса бейеү.*

**ЭСТРА́ДА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Тамашасылар алдында артист һәм музыканттар сығыш яһай торған ҡалҡыу урын; сәхнә. *Асыҡ эстрада. Эстрадаға сығыу.* ■ *Урман системдәге һөҙәк тау итәге ҙур эстрадаға әйләндерелгән.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 20 июль.

**2.** Сәнғәттең төрлө концерт номерҙарынан торған бәләкәй төрө. *Эстрада йырсыһы. Эстрада оркестры.*

**ЭСТӘЛЕК** *и.* Ижад ителгән, яҙылған нәмәнең асылын тәшкил иткән эш-хәл, күренеш һ. б.; йөкмәтке. *Романдың эстәлеге. Һүрәттең эстәлеге.* ■ *Бала йырҙың эстәлеген аңлап, шул тойғола йырлап өйрәнергә тейеш.* Ғ. Сөләймәнов.

**ЭСТӘЛЕКЛЕ** *с.* Тәрән эстәлеккә эйә. *Эстәлекле әҫәр. Эстәлекле хат.*

**ЭСТӘЛЕКҺЕҘ** *с.* Эстәлеге ярлы. *Эстәлекһеҙ әҫәр.*

**ЭСТӘН** *р.* **1.** Һүҙ менән әйтмәй, күңелдән генә. *Эстән генә уйлау. Эстән генә ҡайғырыу. Эстән генә ризалашыу.* ■ *Тимер эстән бик асыуы килһә лә, һалҡын ҡанлылыҡ күрһәтергә тырышты.* Б. Бикбай.

**2.** Нимәнеңдер эс (7 мәғ.) яғынан. *Эстән ҡатлап кейеү. Эстән аҡҡа буяу.* ■ *Мейес тыштан ҡыҙылға әйләнгән, ә эстән Күлуртлар һыу бөркөп һыуытҡан* (Әкиәттән). **Эстән ҡалтырай, тыштан ялтырай** ысын хәлен, кисерешен белгертмәҫкә тырышҡан кешегә ҡарата әйтелә.

**ЭСТӘТ** *и. диал.* Тауҙа өйөлөп ятҡан эре-эре таш.

**ЭСТӘҮ** *к. ҡар.* **эҫтәү.**

**ЭСӘГЕ** *и. диал. ҡар.* **эсәк** 1.

**ЭСӘК** *и.* **1.** Йән эйәләрендә (кеше, хайуан, ҡош-ҡорт, балыҡ һ. б.) аҙыҡ үҙләштереү ағзаһының оҙон көпшә рәүешендәге өлөшө. *Эсәк буйы. Эсәк ауырыуы. Эсәк сейәлеү.* / Малдың аҙыҡ итеп файҙаланылған шул ағзаһы. *Эсәк майы. Эсәк бешереү. Эсәк тултырыу. Эсәк йыуыу.* **Ас (йәки нәҙек) эсәк** эсәктең ашҡаҙан менән туҡ эсәк араһындағы иң оҙон өлөшө.

**Йыуан** (*йәки* **туҡ**) **эсәк** эсәктең ас эсәктән тура эсәккә тиклемге йыуан өлөшө. **Тура эсәк** эсәктең арт юлға килеп бөткән һуңғы өлөшө; күтән. **Һуҡыр эсәк** йыуан эсәктең нәҙек, тоҡон үсеңделе осо.

**2.** Резина йәки брезент көпшә; шланг. *Ут һүндергес мискәләр алып килеп, эсәктәренән һыу һиптереп, урам таштарын йыуҙылар.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Эт эсәге** *диал. ҡар.* **сырмалсыҡ**[1].

**ЭСӘК-ҠАРЫН** *и. йыйн.* Эсәк һәм ҡарын; эс-ҡарын.

**ЭҪЕ** I *с.* **1.** Утта ҡыҙған юғары температуралы. *Эҫе аш. Эҫе көл. Эҫе ҡурмас. Эҫе һурпа. Эҫе һыу.* ■ *[Коралайҙар] һикергәндә .. бәкәлдәре, эҫе табала ҡурған ҡурмас һымаҡ, шырт-шырт итеп бара ине.* М. Тажи. *[Фатима Мансурға:] Лысма еүешһең дә..! Ҡана, кейемеңде алмаштыр ҙа эҫе сәй эсә һал.* Ә. Хәкимов.

**2.** Ғәҙәттәгенән юғары температуралы; ҡыҙыу. *Эҫе ел. Эҫе көн. Эҫе һауа.* ■ *Йәйҙең генә эҫе селләһендә йылҡым сыҡмай киске һалҡынһыҙ* (Халыҡ йырынан). / Тейешле йылылыҡтан юғары температуралы. *Эҫе тын.* ■ *[Айбулат] Васяның эҫе ҡулын үҙенең һалҡын устары эсенә алды.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *күсм.* Хискә тулы; ҡайнар. *Эҫе күҙ йәше. Эҫе ҡосаҡ.* ■ *Мөхәббәтле, эҫе, көслө ҡан бар һиндә.* Ш. Бабич. / Күңелгә яҡын, ҡәҙерле. *Тәүге бала эҫе була.*

II *и.* **1.** Һауаның юғары температурала булған хәле; ҡыҙыулыҡ. *Көн эҫеһендә. Мунсаның эҫеһе.* ■ *Бойҙай уңманы.. Аяуһыҙ ҡыҙҙырған ҡояш эҫеһенә сыҙай алмай бөрөштө.* Я. Хамматов.

**2.** Ауырыу тәндәге юғары температура; ҡыҙыулыҡ. *Муйыл ыңғырашып эҫегә өтөлөп ярылып бөткән ирендәрен ап-аҡ теле менән яланы.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **[Башҡа] эҫе ҡабыу** (*йәки* **тейеү**) үтә нык эҫелектән баш ауыртыу. **Эҫе мәлдә** *ҡар.* **мәл**[1]. **Эҫе тәнеңдә туҙһын** *шул уҡ* **йылы тәнеңдә туҙһын** (*ҡар.* **тән**).

**ЭҪЕЛЕК** *и.* Температура юғарылығы; ҡыҙыулыҡ. *Ҡояш эҫелеге. Тән эҫелеге. Эҫелектән йонсоу.*

**ЭҪЕЛЕ-ҺЫУЫҠЛЫ:** **эҫеле-һыуыҡлы булыу** ҡапыл уянған көслө тойғонан бер өшөп, бер яныу. *Сананан алыҫ түгел, юл ситендә ике бүре ята ине.. Өмәттең тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте.* Д. Юлтый.

**ЭҪЕЛӘЙ** *р.* **1.** Эҫе, ҡайнар көйө. *Эҫеләй ашау.* ■ *[Әбей:] Мә, ошо сәйҙе эҫеләй генә эсеп ебәр ҙә юрғанға уранып ороп, ятып йоҡла.* М. Тажи.

**2.** Тирләгән, һыуынмаған көйө. *Эҫеләй һыу эсеү.* ■ *[Бай:] Ҡарағыҙ, малайҙар, аттарҙы эҫеләй ҡушмағыҙ.* Б. Бикбай.

**ЭҪЕЛӘНЕҮ** *ҡ. ҡар.* **эҫергәнеү.**

**ЭҪЕЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Утта тотоп эҫе итеү; эҫертеү. *Мәғфүрә .. һурпа эҫеләп, уның [Рәхимәнең] алдына ҡуйҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Эҫегә әйләнеү, ҡыҙҙырыу (көнгә ҡарата). *Көн эҫеләй башланы, балыҡ ҡапмай.* Б. Бикбай.

**3.** Эҫелектән яныу тирләү, бешегеү. *Ҡояшта ултыра торғас, айыу эҫеләп китте.* М. Кәрим.

**ЭҪЕНДЕРЕҮ** *ҡ.* Яҡынлыҡ тойғоһо уятып үҙеңә нык эйәләштереү. *Кешене эҫендереү.*

**ЭҪЕНЕҮ** *ҡ.* Яҡын күреп, үҙ итеп, нык эйәләшеү. *Эҫенеп китеү.* ■ *Мин был асыҡ күңелле егеткә эҫенеп тә киттем.* Р. Солтангәрәев.

**ЭҪЕНЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **эҫенеү.** *Эҫенешеп китеү.*

**ЭҪЕРГӘНЕҮ** *ҡ. һөйл.* **1.** Эҫелектән йонсоу бешегеү; эҫеләү.

**2.** Тән температураһы күтәрелеү; яныу.

**ЭҪЕРЕҮ** *ҡ. диал.* Эҫеү.

**ЭҪЕТЕҮ** *ҡ.* **1.** Утта тотоп, эҫегә әйләндереү эҫе итеү. *Сәйҙе эҫетеү. Ашты эҫетеү.*

**2.** Эҫегә әйләнеү (көнгә ҡарата). *Көн эҫетте.*

**ЭҪЕҮ** *ҡ.* **1.** Эҫе хәлгә килеү, эҫе булыу. *Һыу эҫегән. Эҫегән аш.*

**2.** Эҫегә әйләнеү, эҫе булыу (көнгә ҡарата). ■ *«Көн эҫеп китмәҫ борон эшләп ҡалыу кәрәк»,— тине Зилский.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЭҪКЕЛЛЕ** *с.* Тынысһыҙ, уяна-уяна бүленгән (йоҡоға ҡарата). *Йоҡо эҫкелле булды. // Тәүге төндә шикләнеп, эҫкелле ятҡан Сәғиҙә әбей икенсе көн тыныслап, тәрән йоҡоға сумды.* Һ. Дәүләтшина.

**ЭҪКЕРТ** [*рус.* скирда] *и.* Бейек итеп, оҙон һалап һалған һалам йәки көлтә өйөмө. *Бойҙай эҫкерте. Һалам эҫкерте. Эҫкерт ҡойоу. Эҫкерткә һалыу.* ■ *Тау битләүен алып йәйелеп ятҡан игенегермешәр сажинлы оҙон-оҙон өс эҫкерткә әйләнде.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЭҪКЕРТЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **эҫкертләү.** *Эҫкертләнгән һалам.*

**ЭҪКЕРТЛӘҮ** *ҡ.* Эҫкерткә һалыу, эҫкерт итеп өйөү. *Бесәнде тиҙерәк сап та.., йәшел көйгә эҫкертләп ҡышҡа тәмле һаҡла.* С. Ҡудаш.

**ЭҪКӘК** *и.* Ваҡ нәмәне семтеп эләктерә торған ҡыҫҡыс рәүешендәге бәләкәй генә ҡорал. *Эҫкәк менән шырау алыу.* ■ *Хәтижә эҫкәк менән йолҡҡан нәҙек ҡашына ҡара ҡәләм һыҙҙы.* Я. Хамматов.

**ЭҪКӘЛӘК** *с. диал.* Маҙаһыҙлап күп йөрөүсән. *Эҫкәләк кеше.*

**ЭҪКӘЛӘКЛӘНЕҮ** *ҡ. диал.* Күп йөрөп, маҙаһыҙлау.

**ЭҪТӘҮ** *ҡ.* Ниндәйҙер ниәттә, теләктә булыу; теләү. *Ғилем эҫтәү.* ■ *Ерҙәренә шәһәрҙәр бина итеүҙе башҡорттар үҙҙәре эҫтәгәнлеге аңлашылды.* М. Һаҙыев. *Ҡыҙыҡ был Сәлим. Туҡтауһыҙ этлек эҫтәп торған кешегә лә ярҙам итер икән.* И. Ғиззәтуллин.

♦ **Хәйер эҫтәү** *ҡар.* **хәйер**[1] 2.

**ЭТ** *и.* **1.** Йорт һаҡлау, һунар итеү һ. б. кәрәк өсөн ҡулға эйәләштерелгән йәнлек. *Сәүек эт. Бәйле эт. Йорт эте. Көтөү эте. Һунар эте. Эт балаһы. Эт тотоу.*

**2.** *һөйл.* Яуыз кешегә ҡарата әйтелә. *// Эт кеше.* ■ *Батша ҡулын һуҙҙы инде, илдән эттең барын үҙ янына йыйҙы инде, арабыҙҙан эт табып, уны беҙгә ҡуйҙы инде* (Бәйеттән). / Әрләгәндә әйтелә. *[Баяр:] Һимереп ҡоторонаһығыҙмы әллә һеҙ, эттәр!* М. Тажи.

**3.** *һөйл.* Кешенең эш-ҡылығына һоҡланып, аптырағанда әйтелә. *Эт икәнһең.* ■ *[Кәбир:] Колхоз йыйылышында бөтәһен ярҙым да һалдым. Ҡайһы берәүҙәр; «Ну үҙең дә эт кеше*

*инде»,— ти. Эт тигәндәренә лә риза булдым. Ни өсөн тиһәң, был урында ул мактау.. ине.* С. Агиш.

**4.** *һөйл.* Көсәйтеү киҫәксәһе менән «бер кем дә, бер йән эйәһе лә» тигән мәғәнәне бирә. *Эт тә юк урамда. Этем дә белмәй. Эт тә аңларлык түгел. Этем дә күрмәне.*

♦ **Ауыҙынан сыҡҡанды эт ашамаҫ** *кар.* **ауыҙ. Бәйҙән ысҡынған эт кеүек** *кар.* **бәй**[1]. **Диңгеҙ эте** нерпа. **Этем тип тә белмәү** кемделер һанға алмағанда әйтелә. **Майлап ташлаһаң да эт ашамаҫ** (*йәки* **яламаҫ)** *кар.* **майлау. Энә йоткан эт кеүек** эсе эскә тартылып торған, үтә ябыҡ кешегә әйтелә. **Эт алабуға** *диал.* йыланбалыҡ. **Эт алаһы** *диал.* һыла. **Эт алғыһыҙ** насар, алама кейемгә ҡарата әйтелә.— *Өҫтөм эт алғыһыҙ булып туҙып йөрөнөм.* Һ. Дәүләтшина. **Эт ашаһын** 1) ризаһыҙлыҡ белдереп, асыу менән әйтелә. *[Сәхип:] Өтөк, шалапай! Ир булып, башыңа бүрек кейеп йөрөүеңде эт ашаһын.* М. Тажи; 2) йәлләмәҫкә кәрәклекте белдергәндә әйтелә. *[Дауыт:] Йә, әсәй, йәлләмә инде. Берҙән-бер улыңдан йәлләгән малыңды эт ашаһын.* Ш. Янбаев. **Эт аяғы ҡортлаған ер** *кар.* **ҡортлау. Эт балығы** *диал.* 1) этеш; 2) сүмесбаш. **Эт бауыры** эт ҡарағаты һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, тауҙа үҫкән ҡыҙыл ғына емешле ҡыуаҡ. **Эт бөткөһөҙ** бик күп. *Эт бөткөһөҙ эш.* **Эт булыу** йонсоп хәлдән тайыу. **Эт бәйләһәң, торғоһоҙ** йорт, өй бик һалҡын шыҡһыҙ булғанда әйтелә. *Мәктәп эт бәйләһәң торгоһоҙ, балалар, өшөп коршайышып .. ултыралар.* З. Биишева. **Эт бәләһе менән** бик ҙур ҡыйынлыҡ менән. *[Фәйруш — Хәйрушкә:] Инәлеп, ялбарып, эт бәләһе менән саҡ күндерҙем шунда һине.* К. Даян. **Эт бәхетле** бик бәхетле тигән мәғәнәлә әйтелә. **Эт еләге** *шул ук* **эт сейәһе** (*кар.* **сейә**). **Эт имсәге** *кар.* **имсәк. Эт итеп** бик ныҡ, йәлләмәй. *Эт итеп әрләү. Эт итеп туҡмау.* **Эт йылы** ун ике йыллыҡ мөсәлдең ун беренсе йылы (*кар.* **мөсәл**). **Эт йәнле** бик түҙемле, һере. **Эт кеүек** бик ныҡ. *Эт кеүек уҫал. Эт кеүек әрһеҙ.* **Эт көнө** *кар.* **көн**[1]. **Эт көпшәһе** *диал.* шыма көпшә (*кар.* **көпшә**). **Эт көтөүе** *кар.* **көтөү**[3]. **Эт күҙе төтөн белмәҫ** тартынып-оялып тормаған һөмһөҙ кешегә әйтелә. **Эт күлдәк** *диал.* көсөк күлдәк (*кар.* **көсөк**). **Эт күрмәгәнде күреү** *кар.* **күреү. Эт ҡайышы** *кар.* **ҡайыш. Эт ҡаҡыһы** *кар.* **ҡаҡы. Эт ҡарағаты** *кар.* **ҡарағат. Эт ҡойҡаһы** *кар.* **ҡойҡа. Эт менән бесәй кеүек** *кар.* **бесәй. Эт муйылы** *кар.* **муйыл. Эт өйөрө** *кар.* **эт көтөүе. Эт талағыры** *кар.* **талау**[1]. **Эт теше** *диал.* ҡаҙыҡ теш (*кар.* **теш**[1]). **Эт типкеһе** *кар.* **типке**[2] 2. **Эт тиреһен башына ҡаплау** бик яман һүҙҙәр менән әрләү. **Эт тормошо** яфалы, ауыр тормош. **Эт тубығынан** *шул ук* **торна тубығынан** (*кар.* **тубыҡ**[1]). **Эт туйы** шау-шыулы тәртипһеҙ мәжлескә ҡарата әйтелә. **Эттән алып, эткә һалып** әрләү бик яман итеп әрләү. **Эттән көн күреү** *кар.* **көн**[1]. **Эттән тыуған** мәсхәрәләп әрләгәндә әйтелә. **Эт үләне** *кар.* **үлән. Эт һуғарыу** *кар.* **һуғарыу. Эт һыйын килтереү** *кар.* **һый. Эт эсәге** *кар.* **эсәк. Эт эткә, эт ҡойроҡҡа** үҙенә ҡушылған эште икенсе берәүгә ауҙарғанда әйтелә. **Эт әрһеҙе** бик ныҡ әрһеҙ, сыҙамлы кешегә әйтелә. **Эт яшығы** мыҫҡыл итеп әрләгәндә әйтелә.

● *Аҫтыртын эт өрмәй тешләй.* Мәҡәл. *Тай ат булғансы, эйәһе эт булыр.* Мәҡәл. *Эт үҙ ояһында көслө.* Мәҡәл. *Этте таларға эткә ҡуш.* Мәҡәл.

**ЭТА́Ж** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. кар.* **ҡат**[1] 1.

**ЭТАЖЕ́РКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Ҡат-ҡат кәштәләрҙән торған өй ҡаралтыһы. *Йыйнаҡ итеп йыйыштырылған бүлмә.. Бер мөйөштә китап ҡуйылған этажерка.* Ш. Бикҡол.

**ЭТАЛО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Билдәләнгән үлсәү берәмегенең иң дөрөҫ өлгөһө йәки иң дөрөҫ үлсәү приборы. *Метрҙың, килограмдың халыҡ-ара эталоны бынан 90 йыл элек билдәләнгән.* «Совет Башҡортостаны», 1965, 22 октябрь. / Ҡулланылышта йөрөгән башҡа үлсәү ҡоралдарын тикшерә торған иң дөрөҫ үлсәү приборы.

**2.** *күсм.* Сағыштырыу өсөн ҡулланылған үрнәк, өлгө. *Эталон булыу. Эталон итеп алыу.* ■ *Һәр ялтыраған алтын булмағандай, тыштан ҡарағанда күҙ яуын алып торған һәр бер өлгө лә эталон була алмай.* Я. Вәлиев.

**ЭТА́Н** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. хим.* Тәбиғи газ эсендәге яна торған төҫһөҙ газ.

**ЭТА́П** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** *хәрби* Ғәскәр юлындағы ҡунып, тәьминәт алып китә торған пункт. *Этап урынлашҡан ауыл. Этапҡа етмәй туҡтау.*

**2.** Революцияға тиклемге Россияла: юлдағы тотҡондарҙың ҡунып китә торған урыны. *Этаптан этапҡа тиклем.* / Һөргөнгә ебәрелеүселәр ҡыуылып барған юл. *Себер этабы.* / Тотҡондарҙың һаҡ аҫтында барған төркөмө. *Этап менән барыу.*

**3.** Юлдың бер өлөшө. *Походтың тәүге этабы.* / *спорт* Ярыш дистанцияһының бер өлөшө.

**4.** Ниҙеңдер үҫешендәге, эшмәкәрлегендәге бер баҫҡыс, стадия. *1953 йылдан республиканың нефть ятҡылыҡтарын асыуҙа өр-яңы этап башланды.* Д. Бураҡаев.

**ЭТАУЫҘ** *и. диал.* Ҡыпсыуыр.

**ЭТАЯҠ** *и.* Эткә аш һала торған һауыт.

**ЭТБӘКЕС** *и. диал.* Әтмәкәй.

**ЭТЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **этеү** 1. *Ситкә этелеп ҡуйылған өҫтәл.*

**ЭТЕМЕШ** *с.* Тырышып-тырмашып эшен эш иткән; этенмеш. *Этемеш кеше.*

**ЭТЕНЕҮ** *к.* Халыҡты йырып, этә-төртә хәрәкәт итеү. *Этенеп алға сығыу.*

**ЭТЕНМЕШ** *и. кар.* **этемеш.**

**ЭТЕП-ТӨРТӨҮ** *к.* **1.** Аяп, ҡарап тормай этеү, төртөү; эткеләү. *Этеп-төртөп сығарыу.* ■ *Һандыҡ күтәргән кешеләр бер-береһен этеп-төртөп, ҡыҫҡырышып оло ҡапҡанан ағыла.* Б. Бикбай. / *күсм.* Рәнйетеү, ҡағыу. *Еңгәһе лә бик уҫал нәмә, Хәлкәйҙе күрә алмай, һәр ваҡыт этеп-төртөп кенә тора.* Д. Юлтый.

**2.** *күсм.* Бик ауырлыҡ, көс-хәл менән берәй эште башҡарыу. *Этеп-төртөп уҡыу.* ■ *Бына шулай [ҡаралтыһыҙ] этеп-төртөп ике ҡышты ҡышланылар.* Н. Мусин. *Сәлимгәрәй этеп-төртөп кенә бишенсе класты тамамланы, унан һуң мәктәпте бөтөнләй ташланы.* Р. Хәкимов.

**ЭТЕҮ** *к.* **1.** Көс һалып билдәле бер йүнәлештә хәрәкәт иттереү, күсергә, ҡуҙғалырға мәжбүр итеү; этәреү. *Алға этеү. Арттан этеү. Ситкә этеү. Арбаны этеү. Ишекте этеп асыу. Этеп алып барыу. Этеп йығыу. Этеп төшөрөү.* ■ *Һыуға таҡ-*

*таның бер башын төшөрҙөм, .. этеп ебәрҙем. Такта мин этеп ебәргән көс менән Сергеев алдына барып төкәлде.* Д. Юлтый.

**2.** *күсм.* Кешене ниндәйҙер бер эшкә ыңғайлатыу, уның эшенә сәбәпсе булыу. *Енәйәткә этеү.* ■ *Бөйөк тойго этә ине беҙҙе алга.* Х. Ғиләжев.

**ЭТЕШ** *и.* Алабуғалар ғаиләһенә ҡараған, шырт ҡанатлы, ныҡ ҡылсыҡлы ваҡ йылға балығы.

**ЭТЕШЕП-ТӨРТӨШӨҮ** *к. урт. ҡар.* **этеп-төртөү** 1. *Этешеп-төртөшөп килеп инеү.*

**ЭТЕШЕҮ** *к.* **1.** *урт. ярҙамл. ҡар.* **этеү**[1]. *Үр менгәндә арбаларҙы этешергә тура килде.* Й. Солтанов.

**2.** Берен бере этеү, төртөү. *Кешеләр прилавкага яҡынларга тырыша. Этешәләр, тартышалар.* С. Агиш.

**ЭТИК** *с.* Этикаға мөнәсәбәтле; әхлаҡи. *Этик нормалар.*

**ЭТИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Ижтимағи аңдың бер төрө булған әхлаҡ һәм тәртип ҡағиҙәләре тураһындағы философик тәғлимәт. *Материалистик этика.*

**2.** Ижтимағи бер төркөмгә, синыфҡа, бер профессия кешеләренә хас әхлаҡ һәм тәртип ҡағиҙәләре. *Табиптар этикаһы.* ■ *[Анохина:] Партия этикаһы һәр нәмәлә абсолют таҙалыкты һорай.* Х. Мохтар.

**ЭТИКЕ́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и. кит.* Үҙ-үҙеңде тотоуға, әхлаҡҡа бәйле ҡағиҙәләр.

**ЭТИКЕ́ТКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Нәмәгә исемен, хаҡын, эшләнгән урынын күрһәтеп йәбештергән ҡағыҙ; ярлыҡ. *Консерва этикеткаһы. Шырпы этикеткаһы. Этикетка йәбештереү.*

**ЭТИ́Л** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. хим.* Органик ҡатышмаларҙағы углерод һәм водород атомдарынан торған төркөм. *Хлорлы этил. Этил спирты.*

**ЭТИЛЕ́Н** [*рус.*] *и. хим.* Углерод менән водородтан торған төҫһеҙ газ (этил спирты, полиэтилен һ. б. алыу өсөн ҡулланыла).

**ЭТИМОЛОГИК** *с.* Этимологияға мөнәсәбәтле. *Этимологик һүҙлек. Һүҙҙе этимологик яктан асыклау.*

**ЭТИМОЛО́ГИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Тел белеменең һүҙҙәрҙең килеп сығышын, тәүге төҙөлөшөн һәм мәғәнә яғынан бәйләнешен өйрәнгән бүлеге.

**2.** Һүҙҙәрҙең килеп сығышы һәм һүҙҙең шул уҡ телдәге йәки ҡәрҙәш телдәрҙәге башҡа һүҙҙәргә мөнәсәбәте. *Этимологияһы асыҡ булмаған һүҙ.*

**ЭТЙЫҒЫШ** *с. һөйл.* Ныҡышып, тырышып үҙенсә эшләүсән. *Этйыгыш кеше.*

**ЭТКЕЛӘҮ** *к.* Тегеләй ҙә былай, ян-яҡҡа этеү. *Эткеләп алып барыу.* ■ *Агын һыу көсө менән кыуылган бүрәнәләр, бер-береһен тыгыҙлап, эткеләп, ашыга-ашыга алга ага.* И. Насыри. *Күпме ашлыҡ йыйылмай калган! Етмәһә, һаламын өймәйенсә, тегендә-бында эткеләп, һөрөргә трактор төшөргәндәр.* Р. Низамов.

**ЭТКЕС** *и. тех.* Ниҙелер этеп шыуҙырған ҡулайлама.

**ЭТКЕ-ТИПКЕ** *и. йыйн.* Кемдеңдер рәнйетеүе, ҡыйырһытыуы; кемдер тарафынан ҡыйырһытылған, рәнйетелгән хәл; этке-төрткө. *Этке-типкелә йөрөү. Этке-типкелә үҫеү.* ■ *Этке-типке күрмәгән Этколдарга, йөрәкте тураклап ташлай торган моңло әсе кара тарихты төшөнөү кайҙа...* Ғ. Дәүләтшин.

**ЭТКЕ-ТӨРТКӨ** *и. кар.* **этке-типке.** *[Егет] йәштән үк кеше тупһаһында, этке-төрткө аҫтында батраклыкта йөрөп, ауырлыкта үҫ[тә].* И. Көҫәпҡол.

**ЭТКОЛАҠ** *и.* Күгәрсен күҙе һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, яҫы япраҡлы, ҡытыршы йөнтәҫ һабаҡлы, күк ҡыҙыл йәки алһыу, аҡ сәскәле күп йыллыҡ эре үлән.

**ЭТ-ҠОШ** *и. йыйн.* Төрлө йыртҡыс йәнлек. *Эт-коштан һаклау.* ■ *Өйөр айгырҙары колондарын эт-коштан курсып, өйөр тирәһендә урангылап йөрө[й].* М. Буранғолов. *[Әсәйем] өҙләкһеҙ теләк теләй: — Эй, хоҙайым, эт-кошка осрамай гына барып етһәк ярар ине инде.* Ғ. Минһажев.

**ЭТЛЕК** *и.* **1.** Эткә хас сифат.

**2.** *күсм.* Яуыз, насар эш. *Этлек кылыу. Этлек эшләү. Этлек уйлау.* ■ *[Ғаббас мулла] халыкты аң-белемгә карши аяклаңдырыр. Ундай этлекте булдыра торган кеше ул.* З. Биишева. *[Оморҙак:] Эй, бай, тирә-ягыңды абайлабыраҡ кара әле, унда һинең этлегең аркаһында һәләк булган кешеләрҙең һөйәге тулып ята* (Әкиәттән). **Башты этлеккә һалыу** уңайһыҙланмай асыҡтан-асыҡ берәй насар эш ҡылыу, тартынмай этләшеү. / Хәйләле эш, мутлыҡ. *Этлекке оҫта кеше.* ■ *[Искужин:] Булыр ул имәнлетаулыларҙан. Этлек менән мутлыкка килгәндә уларҙан алга сыккан кеше юк.* Ә. Вәли.

**3.** *күсм.* Күргән михнәт, яфа. *Этлек күреү. Этлек менән үҫеү.* ■ *Ошо саскау кара таңда тороп, мәке уйыу мең этлек.* Р. Бикбаев.

● *Эт этлеген итә.* Мәҡәл.

**ЭТЛЕКЛЕ** *с.* **1.** Яуыз, насар уй-ниәтле. *Этлекле кеше.*

**2.** *күсм.* Михнәтле, ауыр. *Этлекле тормош.*

**ЭТЛЕ-МАСЛЫ** *р. диал.* Этле-мырлы. *Этле-маслы тороу.*

**ЭТЛЕ-МЫРЛЫ** *р. һөйл.* Үҙ-ара тынышмай һүҙгә килешеп, талашып. *Этле-мырлы йәшәү.*

**ЭТЛӘНДЕРЕҮ** *к.* Ыҙа сиктереү, интектереү. *Бесән вакытында көн булмай этләндерҙе.*

**ЭТЛӘНЕҮ** *к.* Ыҙа сигеү, яфа күреү; интегеү. *Баш һыҙлап этләнеү. Һыйырһыҙ этләнеү. Кайга алмай этләнеү. Этләнеп йөрөү.* ■ *[Фәфур:] Әй, этләндем дә инде беренсе йылда. Ат булһа, арба юк; арба булһа, камыт юк ине ул сакта.* Ә. Вәли.

**ЭТЛӘС** *и. диал.* Йыланбалыҡ.

**ЭТЛӘТЕҮ** *к.* Ыҙалатыу, интектереү, яфа сиктереү. *Кешене этләтеү.*

**ЭТЛӘҮ** *к.* Ыҙа сиктереү, аҙаплау, интектереү, яфалау. *Ауыр эш менән этләү. Йоклатмай этләү.* ■ *Кайһы дуҫтар сакырганды көтә; унда ла көттөрөп этләп бөтә.* С. Ҡудаш.

**ЭТЛӘШЕҮ** *к.* **1.** Яуыҙлыҡ, насарлыҡ эшләү. *[Иманбай:] Яуыҙдың да яуызы икән Аккужа.. — Тегe вакытта миңә лә этләшкәйне, иблис!* В. Нафиҡов. / Мутлыҡ эшләү; мутлашыу. *Әмир .. татар-башкорт хәрби мәктәбенә этләшеп булһа ла (ул йәшен ҙурайтып кагыҙ алгайны), барып инде.* Х. Ғиләжев.

**2.** *һөйл.* Ныҡ тырышлыҡ һалыу; тырышыу. *[Хәлим:] Ундагы үлән — ни аллага, ни муллага.*

*Шулай булһа ла, өлөшләргә кәрәк. Сапкыһы килгән кеше этләшер.* И. Насыри.

**ЭТМАРБА** *и. диал.* Ҡул арбаһы.

**ЭТМОРОН** *и. диал.* Әлморон.

**ЭТНИК** *с.* Билдәле бер халыҡҡа, ырыуға мөнәсәбәтле. *Этник төркөм. Халыҡтың этник составы.* ■ *Башкорт халкының хәҙерге этник .. йөҙөнөң формалашыуында кыпсак командар ҙур роль уйнаған.* Н. Бикбулатов.

**ЭТНОГЕНЁЗ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Халыҡтың килеп сығышы. *Башкорт халкының этногенезы. Этногенездағы уртаклык.*

**ЭТНО́ГРАФ** [*рус.*] *и.* Этнография буйынса белгес. *Этнограф булыу.*

**ЭТНОГРАФИК** *с.* Этнографияға мөнәсәбәтле. *Этнографик музей. Этнографик карта. Этнографик экспедиция.*

**ЭТНОГРА́ФИЯ** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Халыҡтың килеп сығышын, таралышын, үҙ-ара бәйләнешен, матди һәм рухи культураһын, тормош, көнкүрешен тарихи күҙлектән сығып өйрәнә торған фән. *Этнография өлкәһендә эшләү.*

**2.** Айырым халыҡҡа йәки билдәле бер урынға хас тормош, гөрөф-ғәҙәт, культура үҙенсәлектәре йыйылмаһы. *Башкорт халкының этнографияһы.*

**ЭТНОНИ́МИКА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Ономастиканың ырыу, ҡәбилә, халыҡ, милләттәр атамаһын өйрәнә торған бүлеге.

**ЭТЫЖЫҠ** *и. диал.* Этеш.

**ЭТӘКЛӘҮ** *к. диал.* Ситләтеү, ҡыйырһытыу.

**ЭТӘНЛӘҮ** *к. һөйл.* Ҡат-ҡат этеү. *Этәнләп тороу.*

**ЭТӘРГЕС** [1] *с.* Алға ынтылдырыусы, илһам биргән. *Этәргес көс.*

**ЭТӘРГЕС** [2] *и. кар.* **эткес.**

**ЭТӘРЕҮ** *к. кар.* **этеү.** *Этәреп ебәреү. Этәреп алып барыу.*

**ЭТӘРЕ́Ш** *и.* Алға йүнәлткән, ынтылдырған көс, сәбәп. *Этәреш биреү. Этәреш яһау.* ■ *Бәхәстәр шагирҙы уйланырға, нисектер, үҙ-үҙенә анализ яһарға этәреш бирәләр.* Н. Нәжми.

**ЭТӘРЕШЕҮ** *к. кар.* **этешеү.**

**ЭТӘҮ** *к. диал.* Этеү.

**ЭТЮ́Д** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** Натуранан алып, уны өйрәнеү, ниндәйҙер әҫәрҙең башланғысы итеү маҡсатында төшөргән һүрәт. *Дим ярында ултыра бер художник көҙ этюдын яҙып.* С. Кулибай.

**2.** Айырым мәсьәләгә бағышланған бәләкәй күләмле әҙәби йәки фәнни әҫәр.

**3.** Башҡарыусының уйнау оҫталығын үҫтереү өсөн бер генә музыка ҡоралында башҡарыуға тәғәйенләнгән музыкаль әҫәр. *Скрипка өсөн яҙылған этюд.* / Виртуоз характерҙағы бәләкәй музыкаль әҫәр. *Шопен этюдтары.*

**4.** Актёрҙың уйнау техникаһын үҫтереү өсөн эшләнгән күнекмә төрө. *Этюд уйнау.*

**5.** Шахмат йәки шашкала билдәле бер позицияла аҙ фигуралар менән уйнап еңә торған мәсьәлә.

**ЭҮКӘТӘҮ** *и. иҫк.* Йүкә ағасынан яһаған баулы күнәсек (һөт-ҡатыҡ, бал һалып, эйәр ҡашына элеп йөрөткәндәр).

**Э́ФА** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* Төньяҡ Африкала, Көньяҡ һәм Көньяҡ-Көнбайыш Азияла таралған, ҡара йыландар ғаиләһенә ҡараған ағыулы йылан.

**ЭФИО́П** [*рус.*] *и.* Эфиопияла йәшәгән, семит-хәмит телдәренең береһендә һөйләшкән халыҡ һәм шул халыҡтың бер кешеһе; хәбәш. *Эфиоп халкы. Эфиоп катыны.*

**ЭФИ́Р** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Боронғо грек мифологияһында: һауаның иң юғарғы саф ҡатламы.

**2.** Радио тулҡындары йөрөгән арауыҡ; һауа. *Эфирга таратыу.* ■ *Эфирҙа ниндәйҙер билдәһеҙ рация эшләй башланы.* Ф. Лоҡманов. **Эфирға сығыу** нимәлер тураһында радио аша хәбәр итә башлау.

**3.** Тиҙ осоусан, ҡырҡыу еҫле, төҫһөҙ шыйыҡлыҡтан ғибәрәт органик ҡушылма (медицинала, техника һәм парфюмерияла ҡулланыла). *Катмарлы эфирҙар. Бутил эфиры.* ■ *Нефть эфиры .. химия өсөн бына тигән иреткес.* Д. Бураҡаев.

◆ **Эфир майы** ҡайһы бер үҫемлектәрҙә була торған тиҙ осоусан, хуш еҫле майлы шыйыҡлыҡ.

**ЭФИРЛЫ** *с.* Эфир (3 мәғ.) ҡатыш. *Эфирлы дарыу.*

**ЭФФЕ́КТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Кем йәки ниҙер яһаған көслө тәьҫир. *Эффект яһау.* ■ *Ләкин, өйгә кайткас, ул [бүләктән килгән] эффекттар боҙолдо. Минең сукно ишек төбөнә ырғытылды.* Д. Юлтый.

**2.** Берәй эш йәки сараның һөҙөмтәһе. *Экономик эффект. Юғалтыуҙы кәметеү нигеҙендә алынған эффект. Юғары эффектка ирешеү.*

**ЭФФЕКТЛЫ** *с.* **1.** Бик тәьҫирле, тәьҫире көслө. *Эффектлы телмәр.*

**2.** Яҡшы һөҙөмтәле; файҙалы. *Эффектлы сара. Эффектлы булыу. Эффектлы рәүештә файҙаланыу.*

**ЭФФЕКТЛЫЛЫҠ** *и.* Эффектлы, һөҙөмтәле булыу сифаты. *Материаль байлыктар етештереүҙе үҫтереү һәм уның эффектлылығын күтәреү нигеҙендә халыктың тормош кимәлен күтәреү тәьмин ителә.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 4 декабрь.

**ЭХ** *ымл. кар.* **их.**

**ЭХИНОКО́КК** [*рус.* ⟨ *гр.*] *и. зоол., мед.* Эт, бесәй, бүре кеүек хайуандарҙың эс-ҡарынында була торған бәләкәй генә таҫма селәүсен. / Ошо селәүсендең кеше йәки хайуан ағзаларына инеп ныҡ сирләткән ҡорто. *Эхинококк кешенең күберәк бауыры менән үпкәһенә эйәләшә, шунда ҙурая.* В. Ғүмәров.

**ЭҺ** *ымл. кар.* **ыһ.**

**ЭҺЕ** *ымл.* Ниҙер уйлап, төшөнгән кеүек иткәндә әйтелә. *Директор уның [Сәлихтең] кәңәшенә колак һала, эһе, шулай, әлбиттә, тип уйлап тора.* С. Агиш.

**ЭҺЕЛДӘҮ** *к. кар.* **ыһылдау.**

**ЭҺЕМ** *ымл.* Тамаҡ ҡырғанды белдерә. *«Эһем, эһем»,— тип йомшак кына тамак кырҙы [әбей].* К. Мәргән.

**ЭШ** *и.* **1.** Кешенең ниҙер яһау, етештереү, эшкәртеү, ижад итеү һ. б. менән мәшғүл булыуы; хеҙмәт. *Эшкә сумыу. Эшкә тотоноу. Эште туктатыу. Эш күп булыу. Эш кайнау.* ■ *Эште һөйәм, эш йәм бирә, эш тәм бирә.* Ғ. Хәйри. *Ығы-зығы, ваҡ мәшәкәт тамам, бар эшемдең сыктым осона.*

М. Кәрим. / Ниҙер яһау, етештереү өсөн түгелгән көс. *Эш иҫәбе. Металды эшкәртеүгә киткән эш күләме.* / Кешенең хеҙмәте ҡағылған объект. *Эш биреү. Эш бүлешеү.* **Ике ҡулға бер эш** төрлө эш менән аҙапланмай бер эш менән генә булышҡанда әйтелә. *Әхәттең ике ҡулына бер эш — рәхәтләнеп уҡы ла уҡы.* Р. Ғабдрахманов.

**2.** Нимәнелер булдырыу, етештереү, эшкәртеүгә йүнәлтелгән, рухи йәки физик көс талап иткән шөғөл. *Ижади эш. Аҡыл эше. Иген эше. Ремонт эштәре. Ауыр эш. Еңел эш. Ваҡ эш. Йәйге эш. Ҡыр эше. Өй эше.* ■ *[Гәрәй] йорт тирәһендәге эштәргә тотондо.* А. Карнай. **Ҡара эш** 1) ҡул көсө менән башҡарыла торған эш; 2) яуыз уйлы насар эш. **Ҡул эше** сигеү, бәйләү эше. ■ *Эсәйең көндөҙ фабрикала эшләй, кистәрен ҡул эше менән була ине.* Б. Мирзанов. / Билдәле бер өлкәлә алып барылған күп яҡлы шөғөл. *Йәмәғәт эше. Политик ағартыу эше. Тәрбиә эше. Уҡыу-уҡытыу эше.* ■ *[Баһау] көсөн, һәләтен .. революция эшенә бирә.* Я. Вәлиев.

**3.** Билдәле бер маҡсатҡа йүнәлтелгән төрлө алым, саралар ҙан торған күп яҡлы шөғөл. *Батша хөкүмәтенең эше .. халыҡты баҫыу һәм йәберләү генә булды.* Һ. Дәүләтшина. / Кемдер үтәргә, эшләргә тейешле бурыс рәүешендәге шөғөл; йомош. *Эш менән йөрөү. Эш менән килеү.*

**4.** Махсус белем, профессия, эшмәкәрлек өлкәһе. *Хәрби эш. Инженерлыҡ эше. Нәшриәт эшендә эшләү.* ■ *Беҙҙең бабайҙар китап эшен белмәгән мәлдә, [фольклор] хәҙерге яҙма әҙәбиәт ролен үйнаған.* Ғ. Амантай.

**5.** Билдәле бер урында башҡарыла торған вазифа; хеҙмәт. *Эш сәғәте. Эш урыны. Эшкә инеү. Эшкә йөрөү.* ■ *«Эшкә ялланырға ине, бабай, һинең байың .. мине алмаҫмы икән?» — тине, ти Ҡуҙыйкүрпәс.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». / Учреждение, ведомстволар атамаһының составында ҡулланыла. *Сит ил эштәре министерствоһы.*

**6.** Хеҙмәт һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән нәмә. *Диплом эше. Күргәҙмәгә ҡуйылған эш. Яҙма эш.* ■ *[Һөнәрсе] үҙенең эшенән бер ҡасан да ҡәнәғәт булмаған. Һәр ваҡыт эҙләнгән, өйрәнгән.* З. Биишева.

**7.** Кемгәлер хас булған ҡылыҡ, шөғөл. *Ололар эше. Уйын-көлкө йәштәр эше.* / Йәнлек, бөжәктәрҙең һ. б. йәшәүенә бәйле шөғөлө. *Бал ҡортоноң эше. Үрмәксе эше.* / Төрлө ағза, механизм, машина кеүек нәмәләрҙең хәрәкәттә булыуы. *Мотор эше. Йөрәктең эшен тикшереү.* ■ *Беҙҙең пулемёттар эшкә башланы.* Д. Юлтый.

**8.** Кем йәки нимәгәлер туранан-тура ҡағылған тормош хәлдәре, ваҡиғалар, төрлө хәл-әхүәл, мәсьәлә һ. б. *Эште ҙурға ебәреү. Эш һиндә генә ҡалды. Эш беҙҙә тормаҫ. Эштәр яҡшырҙы.* ■ *Бында һуғыш, бында ҡылыс, бында эштәр ҡурҡыныс.* Ш. Бабич.

**9.** Кәрәкле, файҙалы һәм тейеш тип табылған хәл, күренеш. *Ашамай йөрөү эш түгел.* ■ *Урғанда ла бөкрәйеп йөрө, ашағанда ла бөкләнеп ултыр — эшме ни ул.* М. Тажи.

**10.** Ниндәйҙер мөғәмәлә, ҡатнашлыҡ. *Миндә эшең булмаһын. Кешелә эшем юҡ.*

**11.** Судта йәки башҡа төрлө рәсми рәүештә ҡаралған мәсьәлә. *Эште йыйылышта ҡарау. Эште судҡа ҡуйыу.* / Шундай мәсьәләгә бәйле төрлө ҡағыҙ. *Эш папкаһы. Енәйәтсенең эше менән танышыу.*

□ **Эш итеү** (*йәки* **ҡылыу**) 1) эш алып барыу; эшләү. *[Ғүмәр:] Мин — инженер, мин чертеж менән генә эш итәм.* С. Агиш; 2) ғәмәлгә ярарлыҡ итеү, эшкә ашырыу. *Эште эш итеү.*

♦ **[Ҡулдан] эш килеү** эшләй алыу, ниҙер эшләргә һәләтле булыу. *Ҡулынан эш килмәгән бала-саға менән эшләү.* **Эш башы** етәксе урын. *[Ислам:] Беҙҙә эш башында йөрөгән кешеләр һәр ваҡыт перегиб яһай.* Д. Юлтый. **Эш бешеү** уйланылған уй, ниәт уңышлы барып сығыу. **Эш боҙоу** тәртипһеҙлек ҡылыу, насарлыҡ эшләү. **Эш бөтөү** мәсьәлә хәл ителеү, тамамланыу. *Хат яҙыу менән генә эш бөтмәҫ.* **Эшем эйәһе** (*йәки* **кешеһе**) *мыҫҡ.* эш башҡарған булып йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә. **Эшен бөтөрөү** үлтереү, юҡ итеү. **Эшен килтереү** бик ҡаты әрләү йәки туҡмау. **Эш ирегеү** *ҡар.* **ирегеү**[1]. **Эш көнө** 1) эш, хеҙмәт өсөн ҡуйылған көндәлек ваҡыт. *Эш көнө башланды. Эш көнө бөттө;* 2) *шул уҡ* **хеҙмәт көнө** (*ҡар.* **хеҙмәт**). **Эш күреү** нимәнелер булдырыу, тормошҡа ашырыу өсөн сараһын күреү, хәстәрләү. *Алдан эш күреү.* **Эш күрһәтеү** эшләп файҙа килтереү. *[Етембай — Нисаға:] Ошо Латифа һинең колхозыңа эш күрһәтер өсөн килгәнме ни ул.* М. Хәйҙәров. **Эшкә ашыу** *ҡар.* **ашыу**[2]. **Эшкә ярау** 1) ниҙер эшләргә һәләтле булыу. *Эшкә ярамаған бала-саға;* 2) ниҙер эшләргә яраҡлы булыу. *Эшкә яраған ағас юҡ.* **Эш ҡуҙғатыу** 1) нимә менәндер шөғөлләнеү, мәшғүл булыу. *Әхмүш өйөндә лә бер эш ҡуҙғатманы. Арҡыры яткан сыбыҡты буй ҙа алып һалманы.* Д. Юлтый; 2) дәғүә менән мөрәжәғәт итеү. *Мираҫ тураһында эш ҡуҙғатыу.* **Эш ҡулы** *ҡар.* **ҡул**[1]. **Эш ҡыйратыу** (*йәки* **ҡырыу**) *мыҫҡ.* берәй нәмәне булдырыу, ниндәйҙер уңышҡа ирешеү. *Ҡыҫҡырма, ҡыҫҡырып эш ҡыра алмаҫһың* (Әкиәттән). **Эш сығыу** 1) уңышҡа ирешеү. *Кәңәш итмәй эш сыҡмаҫ;* 2) файҙа, йүн булыу. *Был баланан эш сыҡмаҫ.* **Эш ташлау** эш кешеләренең ризаһыҙлыҡ белдереп күмәкләп ойошҡан рәүештә эш туҡтатыуы. **Эште боҙоу** нимәнеңдер хәл ителешенә ҡамасаулау, зыян килтереү. *Урынһыҙ шелтә менән эште боҙоу. Ямғыр яуып эште боҙҙо.* **Эште төйнәү** ниндәйҙер мәсьәләне хәл итеү, нығытыу. *Һин Вася менән .. ныҡ һөйләшеп, эште төйнәп ҡуй.* Һ. Дәүләтшина. **Эштән сығыу** 1) ныҡ йонсоу, хәл бөтөү. *Эштән сығып арыным;* 2) ҡараҫлыҡ хәлгә килеү. *Эштән сығып бысраныу.* **Эштән сыҡҡан** бик яман. *Эштән сыҡҡан уҫал. Эштән сыҡҡан һаран.* **Эш уҙған** нимәлер ваҡытында хәл ителмәй насар төҫ алғанда әйтелә. *Бер ни эшләп булмай, эш уҙған. Операция яһарға эш уҙған.*

**ЭШАФО́Т** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Үлемгә хөкөм ителгәндәрҙе язалау өсөн махсус эшләнгән бейек урын.

**ЭШЕЛО́Н** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* **1.** *хәрби* Фронт буйынса түгел, ә поход тәртибендә урынлашҡан ғәскәрҙәрҙең хәрәкәт итеүсе йәки хәрби әҙерлектә булған бер өлөшө. *Баш эшелон.* ■ *Оборонала йәки икенсе эшелонда булғанда беҙҙең*

*һалдаттар йыйылышалар ҙа әңгәмә коралар.* Ш. Насыров.

**2.** Махсус тәғәйенләнгән поезд, автоколонна һ. б. төркөмө. *Эшелон менән оҙатыу. Эшелонға тейәү.* ■ *Делегация Башҡортостан хеҙмәтсәндәренән ялҡынлы хат һәм эшелон менән төрлө бүләк алып килгән ине.* Ә. Ихсан.

**ЭШЕМТӘЙ** *и. һөйл.* Күңел һалып, ихлас эшләгән кешегә әйтелә.

**ЭШКИНЕҮ** *ҡ.* **1.** Ниҙер эшләргә һәләтле булыу, эшкә яраү. *Эшкингән бала.* ■ *Ат ҡыуырға эшкингәндән алып, .. атағы [Буранбайҙы] атҡа ултыртты.* Т. Килмөхәмәтов. **Эшкинмәгән** эшкә һәләтһеҙ, йүнһеҙ тигән мәғәнәлә әйтелә.

**2.** Ҡайҙалыр ҡулланырға, тотонорға яраү. *Эшкинмәгән бысаҡ. Эшкинмәгән һауыт. Эшкинмәй ятҡан ер.* ■ *Утыҙ һигеҙ дилбегә, эшкингәне юҡ.* С. Ҡудаш.

**ЭШ-КӨШ** *и. йыйн.* Һәр төрлө ваҡ эш. *Сәүиә .. тиҙерәк эш-көшөн бөтөрөп, кукуруз силослаған ергә ашыға.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЭШКҮРЕМ** *с. диал.* Эшсән. *Эшкүрем кеше.*

**ЭШКӘРТЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **эшкәртеү.** *Эшкәртелгән ер. Редактор тарафынан эшкәртелгән мәҡәлә.*

**ЭШКӘРТЕҮ** *ҡ.* **1.** Берәй ысул менән нәмәнең сифатына йоғонто яһау. *Күнде эшкәртеү. Пар менән эшкәртеү. Кислота менән эшкәртеү.*

**2.** Эшләп еренә еткереү, әҙер итеү. *Баҡсаны эшкәртеү. Деталде эшкәртеү. Ерҙе эшкәртеү.*

**3.** Эшкә ярарлыҡ хәлгә килтереү; эш итеү. *Еләкте эшкәртеү. Шәкәр сөгөлдөрөн эшкәртеү. Нефть эшкәртеү. Сырьё эшкәртеү.*

**4.** Төҙәтеп, яҡшыртыу. *Мәҡәләне эшкәртеү.*

**ЭШЛЕ** *с.* Эш менән мәшғүл. *Эшле кеше.*

● *Эшле килер, эш арттырыр.* Мәҡәл.

**ЭШЛЕК: эшлектән сығыу** *шул уҡ* **эштән сығыу** (*ҡар.* **эш**).

**ЭШЛЕКЛЕ** *с.* **1.** Эшкә әүәҫ, уңған; булдыҡлы. *Эшлекле булыу.* ■ *[Һыуһылыу әбей улына] күңеленән ике ауылдағы иң матур, аҡыллы, эшлекле ҡыҙҙарҙы һайлай.* Ғ. Дәүләтшин. / Эште яҡшы белгән, эшкә һәләтле. *Эшлекле етәксе.* / Ошондай кешегә хас булған. *Эшлекле төҫ. Эшлекле ҡыланыш.* // *Эшлекле йөрөү. Эшлекле һөйләшеү.* ■ *Йәнтимер .. бик эшлекле ҡиәфәт менән беҙҙең янға килде.* С. Агиш.

**2.** Эш өсөн әһәмиәтле, файҙалы. *Эшлекле саралар. Эшлекле фекер.*

**ЭШЛЕКЛЕЛЕК** *и.* Эште белеүҙән, булдыҡлы булыуҙан килгән сифат. *Әфләтуновтың маҡтаныуын яратып еткермәһә лә, Азаматов уның эшлеклелеген хөрмәт итә ине.* Ә. Вәли. *Нәзиф .. йорт тирәһен ирҙәрсә бер эшлеклелек менән күҙҙән кисереп сыҡты.* Ғ. Лоҡманов.

**ЭШЛЕКҺЕҘ** *с.* Эшкә ялҡау, булдыҡһыҙ. *Эшлекһеҙ кеше. Эшлекһеҙ булыу.* / Эш рәтен белмәгән, эшкә һәләтһеҙ. *Эшлекһеҙ бригадир.* ■ *[Сәғит:] ни тип яҙғандар? План тултырмайҙар, председателдәрҙе эшлекһеҙ тип яҙғандармы?* Х. Ибраһимов.

● *Эшлекленең эше бар, эшлекһеҙҙең теле бар.* Мәҡәл.

**ЭШЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **эшләү** 4, 5. *Эшләнгән эш. Ҡомдан эшләнгән һауыт. Ҡыҙырлап эшләнгән сана. Көн дә эшләнәһе эш. Еңел эшләнеү. Эшләнеп бөтөү.*

**ЭШЛӘНЕШ** *и.* Нимәнеңдер эшләнеү рәүеше, алымы. *Нәмәнең эшләнеше. Эшләнеше менән оҡшаш нәмәләр.* ■ *Уға [балаға] күшкас мәсьәләнең эшләнешен һөйләргә, ҡыҙарҙы ла һүҙһеҙ торҙо.* Т. Арслан.

**ЭШЛӘПӘ** [*рус.* шляпа] *и.* **1.** Киң яҫы ситле, бейек түбәле баш кейеме. *Фетр эшләпә. Һалам эшләпә. Эшләпә кейеү.* ■ *Байҙар ғына кейә ҡамсат бүрек, беҙ кейәбеҙ кейеҙ эшләпә* (Халыҡ йырынан).

**2.** *диал.* Һоҫлан.

**ЭШЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **эшләү.** *Ауыр эш эшләтеү. Ат менән эшләтеү. Зыян эшләтеү. Ҡорал эшләтеү. Төҙөлөштә эшләтеү. Моторҙы эшләтеү.*

**ЭШЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Эш менән мәшғүл булыу, көсөңдө ҡулланып эш башҡарыу. *Күмәкләп эшләү. Яланда эшләү.* ■ *Өмәселәр .. эшләй ҙә ярышып бер тына, унан туҡтап, йырлап, шаярып алғас тағы ҡыҙышып эшкә тотона.* Ғ. Амантай. / Билдәле бер урында хеҙмәт итеү, дауамлы эштә булыу. *Заводта эшләү. Мәктәптә эшләү. Тимер юлда эшләү. Төҙөлөштә эшләү.* ■ *Кем хеҙмәтен намыҫ менән үтәй, ҡайҙа эшләмәһен, хур түгел.* Ғ. Сәләм. / Билдәле бер вазифа башҡарыу, кемдер булып хеҙмәт итеү. *Бухгалтер булып эшләү. Корректор булып эшләү. Һатыусы булып эшләү.*

**2.** Берәй эш ҡоралы йәки ярҙамсы көс менән ниндәйҙер эш башҡарыу. *Ат менән эшләү. Тракторҙа эшләү.* ■ *Малайҙар араһынан иң элек ул [Тимер] токарь станогында эшләүгә күсте.* Б. Бикбай.

**3.** Кем йәки нимәлер файҙаһына эш башҡарыу, хеҙмәт итеү. *Кешегә эшләү. Халыҡ өсөн эшләү.* ■ *[Гөлйөҙөм:] Ҡара йәштән төшөп һеҙгә эшләнем, һеҙ ағыу сәсеп оҙатаһығыҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Физик йәки рухи көс һалып нимәнелер барлыҡҡа килтереү, булдырыу, яһау (ғәҙәттә ҡорал, ҡорамал, машина һ. б. ярҙамында). *Арба эшләү. Ҡорал эшләү. Мебель эшләү. Уйынсыҡ эшләү. Эшләп сығарыу.* ■ *Хафиз карт лапаҫ аҫтында нимәләр эшләп маташа ине.* М. Тажи. / Ижад итеү, камиллаштырыу йәки өйрәнеү, тикшереү. *Диссертация өҫтөндә эшләү. Картинаны эшләп бөтөү. Геологик карта эшләү. Роман нигеҙендә фильм эшләү. Мәҡәләне ҡайтанан эшләү.*

**5.** Эшкәртеп әҙерләү, етештереү. *Күн эшләү. Тире эшләү. Май эшләү заводы.* ■ *Зилский иген эшләү өсөн кәрәкле бөтә ҡорал-ҡорамалдарҙы алдан уҡ әҙерләп ҡуйған.* Ғ. Дәүләтшин.

**6.** Башҡарыу, ғәмәлгә ашырыу. *Ҡушҡанса эшләү. Үҙенсә эшләү. Уйлағанды эшләү.* ■ *Ул [офицер] әйткән һүҙен эшләмәй ҡалдыра торған кеше түгел.* Д. Юлтый. *Аҫыл ғына ирҙәр тырышып йөрөр, эшләйем тип аҡыл ҡушҡанын* (Халыҡ йырынан). / Билдәле бер мәсьәләне хәл итеү. *Өйгә биргән дәресте эшләү. Кәңәшеп эшләү. Дөрөҫ эшләү. Хата эшләү.* / Ниндәйҙер бер эш ҡылыу. *Зыян эшләү. Изгелек эшләү. Этлек эшләү. Яҡшылыҡ эшләү.* ■ *Күсәк өйгә ҡайтҡас, әбей өйрәткән хәйләне эшләй.* «Бабсаҡ менән

Күсәк». *Иҫ китәрлек эштәр эшләнек Салауат тигән иргә таяныл* (Халыҡ йырынан). / Ни, нимә һорау алмаштары менән аптырап ҡалғанды, сараһыҙ булғанды белдерә. *Ни эшләргә белмәй тороу. Нимә эшләргә һуң? Нимә эшләмәк кәрәк? Ни эшләйһең инде, башка сара юк.*

**7.** Хәрәкәттә, эштә булыу (ҡоралға, механизмдарға ҡарата). *Мотор эшләй. Станок геүләп эшләй. Машина якшы эшләй. Телефон ватылған, эшләмәй.* / Нимәлер ҡулланып, нимәлер ярҙамында йәки ниндәйҙер ысул менән эш итеү. *Электростанция торф менән эшләй. Ток менән эшләгән станок. Күмер менән эшләгән паровоз.* / Хәрәкәттә булыу, үҙ эшен башҡарыу (тән ағзаларына ҡарата). *Йөрәк туктауһыҙ эшләй. Бер бөйөр шешкән, эшләмәй. Бармаҡтар яҙылды, эшләй башланы.*

**8.** Эш өҫтөндә булыу, эш башҡарыу (учреждение, ойошма һ. б. ҡарата). *Бассейн эшләй башланы. Завод тәүлек әйләнәһенә эшләй. Магазин һигеҙҙән эшләй. Китапхана ял итә, эшләмәй.*

◆ **Аҡса эшләү** *ҡар.* **аҡса.**

● *Иренсәк ике эшләр.* Мәҡәл. *Ир маҡтаныр, ҡорал эшләр.* Мәҡәл. *Күҙ ҡурҡа, ҡул эшләй.* Мәҡәл. *Уйламай эшләгән — ауырымай үлгән.* Мәҡәл. *Эшләгәндә йөрәгең елкенһен.* Әйтем. *Эшләһәң эш ҡарышмай.* Әйтем.

**ЭШЛӘШЕҮ** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **эшләү** 4. *Бура эшләшеү. Эш эшләшеү.*

**ЭШМӘКӘЙ** *с. ҡар.* **эшемтәй.**

**ЭШМӘКӘР**[1] *с.* Эш алып барыуға шәп, эшкә уңған; эшлекле. *[Әбей:] һәйбәт әҙәм ине. Эшмәкәр ине. Эшмәкәр ине. Әҙәмгә зыяны булманы.* һ. Дәүләтшина.

**ЭШМӘКӘР**[2] *и.* Йәмғиәт эше өлкәһендә үҙен танытҡан кеше. *Дәүләт эшмәкәре. Йәмәғәт эшмәкәре. Мәғрифәт эшмәкәре. Сәнғәт эшмәкәре. Фән эшмәкәре.*

**ЭШМӘКӘРЛЕК** *и.* **1.** Ниндәйҙер өлкәлә алып барылған киң күләмле эш. *Эшмәкәрлек күрһәтеү.* ■ *Өфөгә күсеү менән Дауыт Юлтыйҙың йәмәғәт эшмәкәрлеге тағы киңерәк ҡолас алды.* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** Тән ағзаһы үтәгән эш. *Нервы системаһының эшмәкәрлеге.*

**ЭШСЕ**[1] *и.* **1.** Капиталистик йәмғиәттә: етештереү сараларынан һәм ҡоралдарынан мәхрүм ителгән, ялланып, үҙ көсөн һатып йәшәргә мәжбүр булған кеше; пролетарий. *Эшселәр хәрәкәте.*

**2.** Социалистик йәмғиәттә: бөтә халыҡ менән берлектә етештереү сараларына хужа булған һәм йәмғиәттә төп көстәрҙән һаналған, социалистик предприятиела үҙ һөнәре буйынса эшләгән хеҙмәт эйәһе. *Эшселәр синыфы.* ■ *Эшләйҙәр күмәкләп, ер тулып, эшсе һәм игенсе бер булып.* Ғ. Сәләм.

◆ **Эшсе көсө** *эк.* 1) эшсенең билдәле бер эшкә һалған көсө, хеҙмәте; 2) эш башҡарыуға һәләтле кешеләр. *Эшсе көсө йыйыу.*

**ЭШСЕ**[2] *с.* **1.** Етештереү өлкәһендә эшләгән. *Эшсе йәштәр мәктәбе. Эшсе халыҡ. Эшсе депутаттар.*

**2.** Ем тапыған, эшләгән (бөжәктәргә ҡарата). *Эшсе ҡорт. Эшсы ҡырмыҫҡалар.*

**ЭШСЕ-КРӘҪТИӘН** *и. йыйн.* Эшселәр һәм крәҫтиәндәр. *Эшсе-крәҫтиәндәр власы. Эшсе-крәҫтиән хөкүмәте.*

**ЭШСӘН** *с.* **1.** Эшкә тырыш; уңған. *Эшсән егет менән эшсән ҡыҙҙар [сәскәләрҙе] түштәрен ҡаҙарҙар.* М. Ғафури.

**2.** *и. мәғ.* Эш кешеһе, хеҙмәт эйәһе. *Ауыл эшсәндәре. Баҫыу эшсәндәре.* ■ *Игендәрен иккән эшсәндәр, уландарен әйткән сәсәндәр.* С. Кулибай.

● *Эшсән бәхетте эштән эҙләр, ялҡау ситтән эҙләр.* Мәҡәл.

**ЭШСӘНЛЕК** *и.* Эшкә тырыш, уңған булыу сифаты. *Эшсәнлек етешмәү.*

**ЭШ-ХӘЛ** *и. йыйн.* Тормоштағы төрлө эш, хәл, ваҡиға һ. б. күренештәр.

**ЭШҺЕҘ** *с.* **1.** Эш менән мәшғүл булмаған, эше юҡ. *Эшһеҙ кеше.* // *Эшһеҙ йөрөү.* ■ *Өйҙә эшһеҙ ятыу Зыяға үлем менән бер ине.* М. Тажи.

**2.** *и. мәғ.* Эш тапмай, эш менән шөғөлләнә алмай йөрөгән кеше. *Эшһеҙҙәр армияһы.*

● *Эшһеҙҙең ашы тәмһеҙ, үҙе ғәмһеҙ.* Әйтем.

**ЭШҺЕҘЛЕК** *и.* **1.** Эшһеҙ тик торған хәл. *Был эшһеҙлек, бер һүҙ өндәшмәй йөрөү ялҡыҡҡайны инде уны [Булатты].* Б. Бикбай.

**2.** Эшсе, хеҙмәткәрҙәрҙең эш тапмай, эш менән шөғөлләнә алмай йөрөгән хәле.

**ЭШҺӨЙӘР** *с.* Эш яратҡан, эшкә уңған; егәрле. *Эшһөйәр егет.*

**ЭШӘ** *и. диал. ҡар.* **аша**[2].

**ЭШӘНЕҮ** *ҡ. диал.* Ышаныу.

**ЭЯЛЛА** *и. ҡар.* **ималлыҡ.**

# Ә

**Ә**[1] Башҡорт алфавитының ҡырҡынсы хәрефе.

**Ә**[2] *терк.* **1.** Бер-береһенә ҡаршы ҡуйылған теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе йәки һөйләмдең тиң киҫәктәрен теркәү өсөн ҡулланыла. *Уларға [бай балаларына] һуғыш еле ҡағылғаны юҡ, ә беҙ, өс туған, һуғышта йөрөйбөҙ.* Д. Юлтый. *Бәлки сығышты Фәйзуллин яһаһа, килешмәҫ ине, ә минә бата.* С. Агиш. / Бер үк ваҡытта барған төрлө эш-хәлде ҡаршы ҡуйып сағыштырғанда ҡулланыла. *Ҡайныһы ат егә, ә ҡайны бераүҙәре ... аптырап баҫып тора.* һ. Дәүләтшина. *«Ҡыҙыл маяҡ» колхозында инде туңға һөрө башлағандар, ә бында арыш сәселеп бөтмәгән, бер ҡарыш ер һөрөлмәгән.* Б. Бикбай.

**2.** Беренсе һөйләмдәге уй-фекерҙең икенсеһе менән нығытылмағанын, көткәндең киреһе булғанды белдергәндә ҡулланыла. *Ҡул сабып ҡаршыланылар, ә Рәшиҙәгә был да окшаманы.* М. Тажи. *Малай үҫә бара, ә исеме бик хөрт* (Әкиәттән).

**3.** Һөйләмдәрҙе йәки һөйләм киҫәктәрен ҡаршы ҡуйып теркәп, тасуирлап һөйләүҙе көсәйтеү өсөн ҡулланыла. *Их, дуҫтар, йәмле лә көнөбөҙ, ә тыуар көн тағы ла яҡтыраҡ!* Б. Бикбай.

**4.** Бер һөйләмдә әйтелгән уй-фекер икенсеһендә башҡа йүнәлеш алған ике һөйләмде ҡаршы

ҡуйып теркәү өсөн ҡулланыла. *Иллелә иҫәр ҙә ипкә килә тигәндәр, ә ул аҡылһыҙ кеше түгел.* Б. Бикбай. *[Еңгә күрергә килгәндәрҙең] барыһының да күҙҙәре шаршау артында, һике ситендә бойоғоп ултырған йәш еңгә яғына йүгерә, ә уны тиҙ генә күреү мөмкин түгел ине.* Һ. Дәүләтшина.

Ә[3] *киҫ.* **1.** Һүҙ йәки һөйләм алдында баҫым менән әйтелеп, иғтибарҙы тартыу, йәлеп итеү өсөн ҡулланыла. *Ә был сакта тағы яҙ яҡынлай.* Ғ. Сәләм. *Халыҡ моңһоҙ йәшәмәй. Ә моң — илһамлы дәрт сығанағы.* З. Исмәғилов.

**2.** Һорау һәм өндәү һөйләм алдынан килеп, тәьҫирлекте көсәйтә. *[Хафиз:] Ә был төпөштөң хәле нисек? Ҡана, нисә ботҡа арттың икән?* М. Тажи. *Ә һуң йәшәр өсөн ҡайһы һуҡмаҡ менән баралар?* Ғ. Сәләм.

**3.** Ишетмәй ҡалған нәмәне ҡабатлап һорағанда ҡулланыла. *[Сәгиҙә:] Ә? Йыуынып алырға тиһеңме? Бик һәйбәт булыр.* М. Тажи. / Һорау һөйләмдәренең аҙағында һорауҙы көсәйтеү өсөн ҡулланыла.— *[Тимер:] Боронго ырыу йолаһын ҡыуырға мине кем тип беләһең һин, ә?* Б. Бикбай. *[Хисмәтулла:] Нәфисә, ҡайҙа баттың, ә? [Нәфисә:] Хәҙер ҡайтам.* Я. Хамматов.

**4.** Һөйләм аҙағында килеп, ғәжәпләнеүҙе, аптырауҙы, һоҡланыуҙы һ. б. тағы ла көсәйтеү өсөн ҡулланыла.— *Шәп бит, ә!* ■ *Дәрүиш булып йәшәне, дәрүиш булып үлде бит байғош, ә?* З. Биишева.

♦ **Ә тигәнсе** бик тиҙ, шул арала. *Ғүмер генә ә тигәнсе үтә, ә һәйкәлдәр оҙаҡ ҡойола.* Н. Нәжми. **Ә тигәндә мә тип тороу** кешенең һәр һорауын, үтенесен эшләргә әҙер тороу.— *Прилавка артында тороп, ағайҙарыңа ярҙам ит.., ә тигәндә мә тип кенә тор!* С. Агиш.

Ә[4], **э-э** *ымл.* **1.** Нимәнелер иҫкә төшөргәндә, һиҙенгәндә, аптырағанда һ. б. әйтелә. *[Инспектор:] Шәхми ағай, был егет кем була? Үҙеңдең улыңмы? [Шәхми:] Ә-ә-ә, был егет минең хеҙмәтсем инде.* Т. Йәнәби. *«Ә-ә,— тине әбей,— улай булғас, берәй йәнде бөркөт типкәндер».* М. Тажи.

**2.** Осраҡан кешене танығанды белдерә. *[Сакай:] Ә-ә, Тимербулат Янһаров икән.* Б. Бикбай. / Осрашыуға ҡәнәғәт булғанды белдерә.— *Ә-ә-ә, әйләнеп ҡайттығыҙмы ни?* Н. Мусин. *[Сынбулатов — Сәгиҙәгә:] Ә, һаумыһығыҙ, иптәш. Ғәфү итегеҙ, мин һеҙҙе күрмәй ҙә торам.* М. Тажи.

**3.** Асыу ҡатыш ризаһыҙлыҡ белдергәндә әйтелә. *«Ә-ә-ә, һин шулай һөйләшәһеңме ни әле әсәң менән?!» — тип асыуланған Ҡояш [Айға].* З. Биишева. *[Ҡарт — Аҡъял батырға:] Ә-ә-ә, һин дә шулай мине тыңламаҫҡа итәһеңме әле?* (Әкиәттән).

♦ **Ә, теге ни** нимә әйтергә белмәй аптырағанды белдерә. *[Ғамир:] Бәй, ә, теге ни, бының быумаһы тоткан түгелме һуң?* Б. Бикбай.

**ӘБДЕЛ** *и. диал.* Эйәр-өпсөн.

**ӘБДӘН** [*ғәр.*] *р. диал.* Бөтөнләй, тамам. *Әбдән төшөнгәнсе әйтеү.* ■ *Әбдән уйын ҡыҙғандан һуң Бикйән менән Көләйшә ҡуйы бешәлек араһына инеп юғалды.* «Бикйән мәргән».

**ӘБДӘН-МӘҢГЕ** *р. диал.* Элек-электән, борон-борондан. *Әбдән-мәңге килгән йола.*

**ӘБЕГЕҮ** (әбек*ә*) *ҡ. диал.* Йонсоу. *Йәйәү оҙам юл йөрөп әбеккән Сөнәгәт оҙаҡ йоҡланы.* Ж. Кейекбаев.

**ӘБЕЙ** *и.* **1.** Оло йәштәге ҡатын кеше. *Ауыл әбейҙәре. Йөҙ йәшәр әбей.* ■ *— Уф, тиеп һулап ебәрҙе һәр әбей һәм һәр бабай, йәш ваҡытта беҙҙә лә ундай йөрөүҙәр бар ине.* Ш. Бабич. *Егет бер уҡҡа, бер йүнтерәп бөткән әбейгә ҡарап, ауыр итеп көрһөнөп ҡуйған* (Әкиәттән).

**2.** Атай менән әсәйҙең апаһы йәки уларҙан оло ҡатын кеше. / Уларға өндәшеү һүҙе; инәй. *[Ҡуҙыйкүрпәс:] Мине ниндәй ҡыҙ ташлап китте һуң? Ниңә әйтмәйһең, әбей?* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Батша ҡатыны: — Ниңә илайһың, әбей,— тип һорай* (Әкиәттән).

**3.** Оло йәштәге кешенең ҡатыны һәм уға ирененең өндәшәү һүҙе. *Малайҙары юҡ ине уның [Зарифтың]. Ҡарлуғас исемле ҡыҙы ла, әбейе менән үҙе генә ине.* Б. Бикбай.— *Эй, әбей, әбей. .. Сурағолом, алтыным һау ҡайтҡас, миңә шунан да ҙур бәхет булыуын әҙләмәйем.* Т. Хәйбуллин.

**4.** *диал.* Ҡәйнә.

♦ **Аҡ әбей** *диал. ҡар.* **әбей 2. Кендек әбейе** *шул уҡ* **кендек инәһе** (*ҡар.* **кендек**). **Мәскәй әбей** *ҡар.* **мәскәй 2. Әбей емеше** *диал.* дунала, энәлек. **Әбей(ҙәр) сыуағы** *ҡар.* **сыуаҡ**[2]. **Әбей сәсе** *диал.* ҡылған.

**ӘБЕЙ-ҺӘБЕЙ** *и. йыйн.* Оло йәштәге күмәк ҡатын-ҡыҙ. *Рәшиҙә әбей көндәрен күберәк балалар янында һәм йорт ҡарап ҡалған әбей-һәбейҙәр тирәһендә йөрөп үткәрҙе.* К. Мәргән. *Майҙандың .. өсөнсө яғында ҡыҙ-ҡыркын, бисә-сәсә, әбей-һәбей, бала-саға йыйылған, ти* (Әкиәттән).

**ӘБЕРСЕН** *и.* Һырты ерәнһыу көрән, түше, муйынының алғы яғы ҡыҙғылт һоро урман күгәрсене. *Яр буйында әберсендәр күмәкләшеп гөрләйҙәр.* Т. Йәнәби. *Талда һайрап ултырған һандуғасты ҡушарлап әберсендәр теҙелгән.* «Урал батыр».

**ӘБЕРСӘ** *и. диал.* Ҡурай еләге (*ҡар.* **еләк** 1).

**ӘБЕРӘКМӘН** *и. диал. ҡар.* **дегәнәк** 1.

**ӘБЕҮ** *ымл. бал.* Ауырта тигәнде аңлата. *Теймә, әбеү! Әбеү булған.*

**ӘБЕҮЕК** *и. диал.* Ҡара һоло (*ҡар.* **һоло**).

**ӘБЕҮЛӘҮ** *ҡ. һөйл.* Ҡолап-китеп ҡуймаһын тип, баланы аяу, ҡурсыу. *Йәй көнө әсәһе курортҡа киткәс, өй ҡарап, улын көтөп торған Шәфикә апай бер ҙә уны әбеүләп, теләгәнен эшләп торманы.* З. Биишева.

**ӘБЖӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Боронғо йәһүд алфавитындағы хәрефтәр тәртибен күрһәткән мәғәнәһеҙ һигеҙ һүҙҙең беренсеһе һәм шул һүҙҙәргә ҡабул ителгән дөйөм атама. *Әбжәт өйрәнеү.* ■ *Һары сәс бик зирәк булған — бер йылда әлепбейҙе, әбжәтте, иман шартын бөтөп, әфтиәккә төшөп, яртыһына еткән дә ижек таныр сүрәгә төшкән.* М. Буранғолов.

**ӘБЖӘТСЕ** *и. иҫк. кит.* Әбжәт өйрәнеү юлы менән уҡыу ысулын яҡлаған кеше. *[Шаһзада] маҡтанмаҫ, ләкин белем һәм көс яғынан тота үҙен әбжәтсенән дә түбән.* М. Харис.

**ӘБЙӘЗ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Аҡ төҫтәге. ■ *Сәскәйҙәрең әсүәд, йөҙөң әбйәз, Ҡашың кәләм — үҙәк өҙәлер.* М. Фәйзи.

**ӘБРАР** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Изге кешеләр. *Ләимдәрҙең йөҙө кара, нисек тупка кулы бара атырга шәһри Болгарга — нисә әбрар макам саздыр.* Ғ. Соҡорой.

**ӘБРӘКӘЙ** *и. һөйл.* Ярау итә торған махсус урын. *[Нурый:] Ҡалала Дутов оҙагырак торһа, әбрәкәйгә лә иркен барып булмаҫ эле.* А. Таһиров.

**ӘБХӘР** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Диңгеҙ. *Айырган бер-беренән бәндәләрҙе, тиерһегеҙ, был донъяла сәбәп ни? Түгел тау, таш дәхи арала әбхәр, түгел төрлөсә телдә булмак, эй, яр!* С. Яҡшығолов.

**ӘБӘ** [1] *ымл. кар.* **аба.** *Әбә, ҡайһылай бысранган.*

**ӘБӘ** [2] *и. диал.* Әсәй, өләсәйгә өндәшеү һүҙе.

**ӘБӘД** [*гәр.*] *р. иҫк. кит.* Мәңгелеккә, ғүмергә. *Мәңгегә килһен азатлык, мин калайым шунда әбәд.* М. Ғафури.

**ӘБӘДЕЛ-ӘБӘД** [*гәр.*] *р. иҫк. кит.* Мәңгегә, ғүмерлеккә. *Улар әбәдел-әбәд мәхрум вә мәгбүн улдылар.* «Батыршаның хаты».

**ӘБӘДИ** [*гәр.*] *с. иҫк.* Мәңге йәшәгән, бөтмәй торған; ахыры булмай торған (заманға ҡарата).

**ӘБӘК** *и.* Балалар уйыны (әйтемләп бер баланы көтөүсе итәләр; ҡалғандары түңәрәккә баҫа; көтөүсе түңәрәк тышында: «Һайыҫҡандай шыҡырыҡлап, мин йөрөйөм өй һаҡлап, ҡаҙҙай булып ҡыйғаҡлап, һиңә тейәм, һин — әбәк!» — тип, берәүгә һуғып каса ла, буш ҡалған урынға тороРға тырыша; тотолмаҫ элек тороп өлгөрһә, көтөүселектән ҡотола, баҫтырғаны көтөүсе була; тороп өлгөрә алмай тотолһа, тағы үҙе көтөүсе булып ҡала). *Бикбулаттың .. мәктәп йылдары. Мәрйәм осраны. Тәнәфес ваҡыттарында әбәк уйынынан башланган мөнәсәбәт мөхәббәткә әйләнде.* Р. Низамов. **Әбәк әйтеү** әбәк уйынында әйтемләп бер уйнаусыға килеп һуғып ҡасыу. *Ҡыр елдәре әбәк әйтеп үтә, кырҙа елде нисек тотаһың?* И. Кинйәбулатов.

**ӘБӘК-КӨБӘК** *и.* Балалар уйыны (бер-бер артлы теҙелешеп торалар; көтөүсе алда торған баланың усына һуғып: «Әбәк-көбәк, алтын табаҡ, етә алһаң, көмөш ҡалаҡ, етә алмаһаң, артыңа етмеш көрәк көл!» — ти ҙә йүгереп ҡаса; тегенеһе уны баҫтыра, ҡасып барып, теҙелгән төркөмдөң ҡойроғона баҫа алһа, баҫтырған бала көтөүсе була, ҡаса алмай тотолһа, яңынан үҙе көтөүсе була, ә баҫтырып тотҡаны ҡойроҡҡа баҫа).

**ӘБӘКЛӘҮ** *к.* Әбәк әйтеп ҡасыу. *Вася .. дуҫының арҡаһына шап итеп һугып әбәкләне лә: — Саптык! — тип урам буйлап йомолдо.* Х. Мохтар.

**ӘБӘК-ҺӘБӘК** *р.* **1.** Бер ары, бер бире; арылы-бирелә. *Бисәләр әбәк-һәбәк имсәк балаларын күтәреп [үтте].* Һ. Дәүләтшина. *Сөнәгәттең ҡайтканын ишетеп, өйгә кеше тулып китте,.. бер инеп, бер сыгып, ишек ягы талдырмай әбәк-һәбәк йөрөп торҙо.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *диал.* Ара-тирә, һирәк-һаяҡ. *Әбәк-һәбәк күренеп ҡала.*

**ӘБӘЛӘК** *с. диал.* Сәбәлән, бәләсел. *[Йыһан — Шәмсигә:] Ә һуң, туҡмаһа нимә булыр ине, үлер инеңме? Әбәләк.* Ғ. Хәйри.

**ӘБӘЛӘНЕҮ** *к. диал.* Сәбәләнеү. *Әбәләнмә, тик торһаң, ҡорт сакмай.*

**ӘБӘҮ** *ымл. кар.* **абау.**

**ӘГӘР** [*фарс.*] *терк.* **1.** Ғәмәлгә ашырылырлы шартты белдергән эйәрсен һөйләмде баш һөйләмгә теркәп, шартлыҡ төшөнсәһен көсәйтә. *Тыныс кына ятырга кәрәк. Әгәр шаулаша башлаһаң, иртәгә ук тоторҙар ҙа фронтҡа ебәрерҙәр.* Д. Юлтый. *Ватандың аргы сигенән йәйәүләп сыкһаң әгәр, йыл йөрөрһөң етә алмаҫһың бирге сигенә ҡәҙәр.* Р. Ниғмәти. / Ғәҙәттә «ҙә» киҫәксәһе менән килеп, уй-теләккә йәки ысынбарлыҡҡа тап килмәгән төшөнсәле шарт эйәрсен һөйләмде баш һөйләмгә теркәй. *[Миңлебай әсәһенә:] Әгәр ҙә һинең күргән бер төшөң раҫ булып торган булһа, һин беҙҙе күптән байытып-сереп бөткән булыр инең инде.* Т. Йәнәби. *[Зәйнәп:] Сәйҙел, әгәр беҙҙең бала тыуһа, уны һин һөймәҫ инеңме?* Ғ. Сәләм. / Күберәк «икән» модаль һүҙе менән шарт эйәрсен һөйләм составында килеп, баш һөйләмдән аңлашылған эш-хәлдең сәбәбен йәки нигеҙен тәшкил иткән ҡылымдың мәғәнәһен көсәйтә. *Әгәр һөйләүсе ҡыҙыу һөйләй икән, уны тәүҙә бер-ике тапҡыр ирекле һөйләтеп тыңларга кәрәк.* Ғ. Амантай. *Бөгөн метр системаһына күсергә карар иттек әгәр кәрәк икән, иртәгә ук был системаны өйрәнеү өсөн кружок асырга тейешбеҙ.* С. Агиш. **Әгәр ҙә мәгәр** әгәр һүҙенең көсәйтелгән төрө. *Әгәр ҙә мәгәр тракторҙы төҙәтергә тура килһә хәбәр итермен.* Н. Ҡәрип. **Әгәр ки** *кит.* әгәр ҙә.

**2.** Инеш һөйләм ҡылымының шартлылыҡ фараз итеү мәғәнәһен көсәйтә. *[Гәрәй — Фәхригә:] «Көрәш» колхозының фермаһында, әгәр яңылышмаһам, һуң тыуган ун башлап быҙау булырга кәрәк.* Б. Бикбай. *Бында ни булган, ни ишеткәндәреңде, Лениндың хаты тураһында әгәр ҙә ишетмәгән булһалар, бәйнә-бәйнә һөйлә.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Икенсе һөйләм менән сағыштырылған йәки уға ҡаршы ҡуйылған һөйләмдең башында килеп, уның ҡылымының мәғәнәһен көсәйтә. *Әгәр беҙ был фронтта еңелгәнбеҙ икән, беҙҙең союзниктарыбыҙ көслөләр.* Д. Юлтый. *Әгәр ҙә Октябргә тиклем тәбигәт бөтә әҙәм балаларын үҙенә буйһондорган булһа, хәҙер ул әҙәм балаларының көнкүреше өсөн бер корал булып әүерелде.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**4.** Ябай һөйләмдә теләкте белдергән ҡылымдың мәғәнәһен көсәйтә. *Әгәр һин уның [Ш. Хоҙайбирҙиндың] Кронштадт өсөн булган һуғыш тарҙагы батырлыгын күрһәң ине!* З. Биишева.

**5.** Риторик һорау ҡуйған һөйләмдең башында килеп, уның ҡылымының мәғәнәһен көсәйтә. *Әгәр калага күсереп бергә торһаң?* Б. Бикбай.

**ӘГӘРСЕН** *и. диал.* Әберсен.

**ӘҒЗӘМ** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Бик бөйөк, бик юғары дәрәжәле; оло. *[Мирза:] Батша әгзәм хәҙрәттәренең әмеренә буйһоноу һәр бер хак мосолман бурысы!* Ғ. Хәйри. *1648 йыл Риң, Азяу халкын яулап, шаһыбыҙ әгзәм хәҙрәттәренә ихласлы хеҙмәт итеп, дошманын алып бирҙек.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

♦ **Исме әғзәм уҡыу** алланы данлау. *[Ҡандала] аллаға һырынып, йәнен уҫҡа тотоп, ҡалтырайҙыр исме әғзәмдәр уҡып.* Ш. Бабич.

**ӘҒЛӘ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Иң юғарғы, иң бейек. **Ғәрше әғлә** 1) күктең иң юғарғы ҡатламы, бейек урын. *Төрлө хыялдарға батып, ғәрше әғлә осам.* Ш. Бабич; 2) *күсм.* бейеклек, юғарылыҡ; юғарғы урын, тәхет. *Инде шатланмаҫ ул күреп донъяның ләззәттәрен, .. тик шулай ҙа ғәрше әғләләргә еткән был күңел.* Я. Юмаев.

**2.** *иҫк.* Бик хөрмәтле, ҡәҙерле; оло, өлкән. *[Ҡоҙа] беҙҙе һин ҡылмағыл мәхрүм ки йәннәт әһле әғләнән* (Мөнәжәттән).

**3.** Бик яҡшы. *Әғлә шарап. Әғлә келәм.* ■ *[Фажиға:] Күстәнәсемдең иң әғләһе менән сәй эсеп алайыҡ әле.* С. Кулибай. *Ҡурай [музыка коралдары араһында] ҡарамаҡҡа иң ябайы. .. Шулай ҙа ул беҙгә иң әғләһе, моңлоराғы һымаҡ.* Ғ. Хөсәйенов.

**ӘҒМАЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Эш, хеҙмәт.

**2.** Эш-хәрәкәт.

♦ **Әғмал әрбәғә** *мат.* дүрт ғәмәл. *Хисаптан әғмал әрбәғәне яҡшы беләм.* Б. Бикбай.

**ӘҒМАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тормош, ғүмер.

**ӘҒРАФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит. дини* Йәннәт менән йәһәннәм араһындағы урын. *[Ҡолош хәҙрәт:] Я раббым, урының ожмах ҡыл, был изге бәндәнең мәкәнен әғраф ялағында ҡалдырма.* Т. Хәйбуллин.

**ӘҒҮӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡотҡо. **Әғүә һалыу** ҡотортоу.

**ӘҒҮӘСЕ** *и.* Ҡотҡосо.

**ӘҒӘЛӘ**: **әғәлә килеү** *диал.* нимә менәндер мәшәҡәтләнеп пыр туҙыу.

**ӘДА** [*ғәр.*]: **әда итеү** (*йәки* **ҡылыу**) үтәү. *Фарыздарҙы әда ҡылығыҙ.* «Батыршаның хаты».

**ӘҘ** *р. ҡар.* **аҙ.** *Әҙ аҡса. Әҙ ғүмер. Әҙ ҡанлылыҡ. Әҙ тиражлы. Әҙ белеү. Әҙ һөйләү.*

**ӘҘЕП** *и.* Кейем-һалымдың ситенә тиҫкәре яҡтан ҡатлап һалған тар туҡыма киҫәге. *Ең әҙебе. Әҙеп ҡуйыу. Әҙеп һалыу.*

**ӘҘЕПЛЕ** *с.* Әҙеп һалған, әҙепләнгән. *Әҙепле елән. Әҙепле итәк.*

**ӘҘЕПЛӘТЕҮ** *ҡ.* Әҙеп һалдырыу. *Ең осон әҙепләтеү. Итәк осон әҙепләтеү.*

**ӘҘЕПЛӘҮ** *ҡ.* Әҙепле итеү, әҙеп һалыу. *Плис еләндең .. яға, салғый итәктәренә әҙепләгән ҡыҙыл соғаһы төҫөн үҙгәртеп аҡһыл бер төҫкә әйләнгән.* Ғ. Дәүләтшин. *Инәйем ҡулдәк киҫмәһен, ситкәйҙәрен әҙепләп текмәһен* (Халыҡ йырынан).

**ӘҘЕР** [*ғәр.*] *с.* **1.** Файҙаланыуға яраҡлы булған, яраҡлы хәлгә килгән. *Әҙер бура. Әҙер ҡулдәк.* ■ *Балсыҡ әҙер булғас та станокка ҡуялар.* Ғ. Амантай. *Иптәш Сынбулатов, аттар әҙерме?* М. Тажи. / Кемдер алдан хәстәрләп әҙерләгән, файҙаланыуға яраҡлы хәлгә килтергән. *Әҙер донъя. Әҙер малға хужа булыу.* // *Әҙерҙе көтөү.* ■ *Тоткон коштай башкортка әҙер ирек бармы ни?* Салауат Юлаев. *Беҙ тормоштоң әҙләмәнек бер ҙә әҙерен.* Б. Ноғоманов.

**2.** Алдан уйланған йәки уйланылған. *Әҙер фекер. Әҙер һорау.* ■ *«Һин тағы китәһеңме ни? Батша төшкән бит һуң». Был һорауға Имайҙың әҙер яуабы юҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Нимдәйҙер эште башҡарырлыҡ хәлдә булғанды, үтәргә ризалыҡты белдерә. *Әҙер булыу.* // *Китергә әҙер ултырыу.* ■ *Хәбәрем бар күп ерҙән, батыр ҙа батыр ирҙәрҙән ..: бары ла әҙер торалар.* Салауат Юлаев. *Ватанды яҡларбыҙ, кәрәк икән, ғүмеребеҙҙе бирергә лә әҙербеҙ.* М. Тажи. / Нимәнелер эшләргә йыйынғанды, йәтеш кенә торғанды белдерә. *Бейеп китергә әҙер. Әҙ генә нәмә өсөн бола ҡуптарырға әҙер.* ■ *Ҡолморҙа старшина менән Әкбәр доверенный .. ошаҡҡа бирелеп, ер ҡыртышын йоторға әҙер тора.* Т. Хәйбуллин.

♦ **Шул әҙере** шул минутта, шунда уҡ. *[Ҡунай] өйгә инеп, шул әҙере йоҡларға ята* (Әкиәттән). **Әҙергә бәҙер** (*йәки* **хәҙер**) кеше эшләгән нәмәгә эйә булырға торған кешегә ҡарата әйтелә. *Әҙергә бәҙер булыу.* ■ *Ял йортонда һәммәһе лә .. әҙергә бәҙер шарттарҙа йәшәй: түшәк йәйеүле, аш-һыу әҙер, күңел көр.* Н. Иҙелбай.

**ӘҘЕРЛЕК** *и.* **1.** Нимәнелер булдырырға, нимәлер эшләргә бәйле төрлө эш, күрелгән хәстәрлек һәм уларҙың үтәлеше. *Әҙерлек саралары. Әҙерлек эше. Әҙерлек алып барыу. Әҙерлек күреү. Сәсеүгә әҙерлекте тикшереү.* ■ *Колхозда Октябрь байрамына әҙерлек бара.* Б. Бикбай. *Ырымбурҙан йырсы Ғәзиз Әлмөхәмәтов килеп төштө һәм концерт бирергә әҙерлек күрә башланы.* С. Ҡудаш.

**2.** Уҡып алған, эш барышында өйрәнеп үҙләштерелгән махсус белем, тәжрибә. *Теоретик әҙерлек. Профессиональ әҙерлек. Әҙерлек кимәле.* ■ *Эш өҫтөндә һиңә уҡыу ҡайҙа? Урыҡ-һурыҡ уҡыһаң уҡыйһың. Аҙ әҙерлек менән килгәнгә, дәрестәрҙә әҙерәк хөртөйһөң.* Ғ. Амантай.

**ӘҘЕРЛЕКЛЕ** *с.* Тейешле белеме, тәжрибәһе булған. *Әҙерлекле агроном.* ■ *Кискелекҡә өйгә заданиеларҙы күберәк бирә хәҙер уҡытыусылар. Был, билдәле, әҙ әҙерлекле курсанттар өсөн байтаҡ ҡыйынлыҡ тыуҙыра.* Б. Бикбай. *М. М. Шайморатов .. бик әҙерлекле, юғары культуралы кадрҙағы офицер, йыйнаҡ, уйлап ҡына һөйләй.* С. Әлибаев.

**ӘҘЕРЛЕКҺЕҘ** *с.* Белеме, тәжрибәһе тейешле кимәлдә булмаған. *Әҙерлекһеҙ кеше.* ■ *Хәҙерге эшселәр — кисәге крәҫтиәндәр. Политик яҡтан наҙандар. Белемдәре юҡ. Эсерҙар шунан файҙалана. Большевиктар партияһы сафына инеүселәр ҙә әҙерлекһеҙ.* Я. Хамматов.

**ӘҘЕРЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** *йөкм. ҡар.* **әҙерләнеү.** *Дәрескә әҙерләндереү. Юлға әҙерләндереү. Ярышҡа әҙерләндереү.*

**2.** Нимәгәләр әҙерлек алып барырға мөмкинлек биреү. *Байрамға әҙерләндереү. Имтиханға әҙерләндереү. Концертҡа әҙерләндереү. Сәсеүгә әҙерләндереү.*

**ӘҘЕРЛӘНЕЛЕҮ** *ҡ. эйһ. ҡар.* **әҙерләнеү** 2, 3. *Йыйылышҡа ныҡ әҙерләнелде.*

**ӘҘЕРЛӘНЕҮ** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **әҙерләү** 1—5. *Малға әҙерләнгән бесән. Әҙерләнгән һыйыу. ■ Ҡышҡа етерлек утын әҙерләнгән.* М. Тажи.

**2.** Нимәгәләр әҙерлек алып барыу, әҙерлек күреү. *Байрамға әҙерләнеү. Имтиханға әҙерләнеү. Концертҡа әҙерләнеү. Сәсеүгә әҙерләнеү.* ■ *Фронт яҡынлау сәбәпле приют эвакуацияға әҙерләнә.* Д. Юлтый. / Буласаҡ эш-хәлгә үҙеңде

әҙер тотоу, йыйынып әҙер тороу. *Әҙерләнеп көтөү.* ■ *[Ныяҙгол:] Алдан сапкын ебәртермен, әҙерләнеп тороғоҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *-ырға* формаһындағы төп ҡылымдан һуң килеп, берәй эш башҡарырға ниәт иткәнде белдерә; йыйыныу. *Китергә әҙерләнеү. Сығып китергә әҙерләнеү.* ■ *Ҡарттар көндөҙгө эште бөтөрөп ятырға әҙерләнгәндәр.* Ғ. Дәүләтшин. *Сәй эстек тә әҙерләндек барырға тип бағыуға* (Бәйеттән). / Шул уҡ грамматик формала билдәле бер хәлдең яҡынлашыуын белдерә (ғәҙәттә тәбиғәт күренештәренә ҡарата әйтелә). *Ямғыр яуырға әҙерләнә.* ■ *Урамдың осонан ҡояштың ҡыҙғылт төҫкә буялып, байырға әҙерләнгәне һиҙелә.* С. Агиш.

**ӘҘЕРЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **әҙерләү** 1—5. *Аш әҙерләтеү. Урын әҙерләтеү.*

**ӘҘЕРЛӘҮ** *к.* **1.** Тотоноу, ҡулланыу өсөн булдырыу, әҙер итеү. *Аҡса әҙерләү. Бүләк әҙерләү. Әҙерләп ҡуйыу.* ■ *[Ҡыҙҙар:] Беҙ икегеҙгә бик матур итеп, бөтә оҫталығыбыҙҙы һалып, тәмәке өсөн кисет әҙерләнек.* Д. Юлтый. *Һайлап-һайлап йөҙ илле аҙамат алды, яу ҡоралын барын да әҙерләп алды.* «Бабсаҡ менән Күсәк». / Нимәнелер ҡулланырлыҡ, әҙер хәлдә тотоу, әҙер итеү. *Ул [Аҡмырҙа] атының теҙгенен ебәреп, артҡа ҡарап ултырған да уҡ-һаҙағын әҙерләп бара, ти* (Әкиәттән). / Алдағы көндә ҡулланыу, тотоноу өсөн туплау, һаҡлыҡҡа йыйыу. *Ағас әҙерләү. Ҡышҡылыҡҡа утын әҙерләү.* ■ *[Әткәй:] НЭП булғаны бирле икмәк йыймайбыҙ, ә әҙерләйбеҙ. Йыйыу менән әҙерләү араһында айырма бар.* А. Таһиров.

**2.** Билдәле бер эшкә әҙер итеү, эшкә яраҡлы хәлгә килтереү. *Мәктәпте уҡыу йылына әҙерләү. Элеваторҙы иген ҡабул итергә әҙерләү.* ■ *Сәлмән баҡсаһындағы бөтә ерҙе ҡаҙып бөтөргән, хатта ҡул тырмаһы менән тырматып, иртәгә иртүк картуф ултыртырға әҙерләп ҡуйған* (Әкиәттән).

**3.** Ашау, туҡланыу өсөн нимәләр булдырыу, аҙыҡ әҙер итеү. *Ашарға әҙерләү. Тамаҡҡа әҙерләү. Әҙерләп ашау.* ■ *Имән батыр яҡшылап аш әҙерләгән, ти* (Әкиәттән). / Ашамлыҡты һый өсөн өҫтәлгә, табынға һ. б. ултыртыу; өҫтәл ябыу. *Һый әҙерләү.* ■ *Лилифә үҙенә ҡайтып, тиҙ генә сынаяҡ, сәнске, ҡалаҡ килтерҙе лә өҫтәл әҙерләй башланы.* Ғ. Ибраһимов.

**4.** Билдәле бер маҡсатҡа бәйле эште үтәүгә әҙер итеү. *Кешене юлға әҙерләү.* ■ *Алыҫ юлға әҙерләйҙәр аттарҙың иң яҡшыһын.* М. Кәрим. / Ниндәйҙер маҡсатта уҡытыу, өйрәтеү, кәрәкле белем, тәжрибә биреү; ниндәйҙер эшкә әҙер итеү. *Ветеринарҙар әҙерләү. Кадрҙар әҙерләү. Уҡытыусылар әҙерләү.* ■ *Әҙерләйем алғы көндәр өсөн көрәшселәр — ҡыҙыл батырҙар.* Ғ. Амантай. *Халыҡ йырсыһы Ғ. Әлмөхәмәтов Мәскәү консерваторияһында йырсылар һәм бейеүселәр әҙерләй.* Ғ. Минһажев.

**5.** Нимәлер өҫтөндә эшләү, ниндәйҙер эш менән булыу. *Дәрес әҙерләү. Мәҡәлә әҙерләү. Проект әҙерләү. Роль әҙерләү. Спектакль әҙерләү.* ■ *Сәғиҙә .. әҙерләгән докладын уҡып, кәңәш алыр өсөн Таймурзинды эҙләп колхоз идараһына килде.* М. Тажи. / Нимәнелер эшләргә йыйыныу, алдан нимәләр уйлау. *Яуап әҙерләү.* ■ *Новиков менән яуаплаша башлаһаң, ул һинең бер һүҙеңә ун төрлө һүҙ әҙерләй.* Д. Юлтый.

**6.** Берәй эш-хәлгә, хәбәргә кемделер рухи яҡтан әҙер итеү (ғәҙәттә тәрән кисерештәрҙән һаҡлау, ҡурсалау ниәте менән эшләнә). *Күңелһеҙ хәбәргә әҙерләү. Көрәшеү шатлығына әҙерләү.*

**ӘҘЕРЛӘҮСЕ** *и.* Дәүләткә ит, йөн, һөт һәм башҡа нәмә йыйыу өлкәһендә эшләгән кеше. *Район әҙерләүселәре.*

**ӘҘЕРЛӘШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **әҙерләү** 1—4. *Юл кәрәк-яраҡтарын әҙерләшеү.*

**ӘҘЕРНӘ** *и.*, **әҙернә ян** Һыртына бүре тарамышы ҡуйып, мөгөҙҙән яһаған ян. *Әҙернә тарттым, уҡ аттым, беләкәйемә таянып.* Салауат Юлаев. *Беҙ бында уҡ-һаҙағын, әҙернә янын билено тағып, ҡош сөйөп, ат уйнатып йөрөгән башҡорт егеттәрен .. күрҙек.* Ш. Шәһәр. *Кинйә .. өйгә инеп, әҙернәһе менән уҡтары һалынған һаҙағын алды.* Ғ. Ибраһимов.

**ӘҘЕРӘК** *р. ҡар.* **аҙыраҡ.** *[Новиков:] Һеҙҙә һатып алырға әҙерәк икмәк булмаҫмы?* Д. Юлтый.

**ӘҘИБӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Яҙыусы, әҙәбиәтсе ҡатын. *Өлкән әҙибәбеҙ Зәйнәп Биишеваны гына алайыҡ. Уның тәүге хикәйәһе .. бынан 36 йыл элек .. баҫылып сыға.* В. Исхаҡов.

**2.** *(баш хәреф менән)* Ҡатын-ҡыҙ исеме.

**ӘҘИП** [*ғәр.*] *и.* Яҙыусы, әҙәбиәтсе. *Әҙәбиәт кәсебе менән йәшәгән бер яҙыусы ла юҡ. Ҡартыраҡ әҙиптәребеҙҙең барыһы тиерлек мәсьүл урындарҙа эшләй.* Д. Юлтый.

**ӘҘЛӘП** *р.* Әҙ-әҙ генә итеп; аҙлап. *Әҙләп эшләү. Әҙләп өйрәнеү.*

**ӘҘМЕ-КҮПМЕ** *р. ҡар.* **аҙмы-күпме.** *Әҙме-күпме ғүмер ҡалған. Әҙме-күпме аҡса алаһы бар.*

**ӘҘ-МӘҘ** *р.* Әҙ генә, саҡ ҡына; бер аҙ, аҙ-маҙ. *Әҙ-мәҙ аҡса эшләү. Әҙ-мәҙ йөрөп килеү.* ■ *Күктә әҙ-мәҙ генә болоттар күренә.* С. Агиш.

**ӘҘРӘС** *и.* Аласа биҙәкле үзбәк ебәге. *Йәшел буй әҙрәс. // Әҙрәс елән.* ■ *Ғөбәйҙә әле яулығын, әле өҫтөнә кейгән әҙрәс камзулын бер туҡтамай төҙәтә.* Ғ. Ғүмәр. *Әҙрәс бишмәт түҙмәй тиҙәр, әкрен-әкрен генә түҙә икән* (Халыҡ йырынан).

**ӘҘСЕЛЕК** *и. ҡар.* **аҙсылыҡ.**

**ӘҘҺЕНЕҮ** *к.* Берәй нәмәнең күләмен, һанын әҙ күреү; аҙһыныу. *Бала бирелгән бутҡаны әҙһенде.* М. Ғафури. *Атайым биш дәфтәр тапты. Мөхтәр ағай әҙһенде.* Ф. Иҫәнғолов.

**ӘҘӘБИ** [*ғәр.*] *с.* **1.** Матур әҙәбиәткә мөнәсәбәтле; шул әҙәбиәткә ҡараған. *Әҙәби журнал. Әҙәби мираҫ. Әҙәби әҫәр.* ■ *Дини дәрестәр менән артыҡ мауыҡманы Сафа, намаҙға бик бил бөкмәне, күп әҙәби китаптар уҡыны.* Б. Бикбай. / Әҙәбиәтте өйрәнеүгә бәйле булған. *Әҙәби түңәрәк. Әҙәби тикшеренеү.* / Ниндәйҙер художестволы әҫәргә ҡараған, матур әҙәбиәт әҫәренән алынған. *Әҙәби герой. Әҙәби образ.*

**2.** Тәнҡит әҫәрҙәре, художестволы һәм публицистик әҫәрҙәр ижад итеүгә бәйләнешле. *Яҙыусының әҙәби эшмәкәрлеге.* / Художестволы әҫәрҙәр ижад итеүгә бәйле һәләттән килгән.

*Әҙәби талант.* ■ *Беҙҙең әҙәби тәнкит элеккесә һаман бер яклы, ул әҙәби оҫталык мәсьәләләрен тейешле кимәлгә күтәреп еткерә алмай.* Ғ. Хөсәйенов.

♦ **Әҙәби тел** дөйөм халыҡ теленең грамматик, лексик һ. б. яктан билдәле бер нормаға килтерелгән, эшкәртелгән формаһы. *Үҙәк һәм Урта Азияла йәшәгән үзбәк, уйғыр кеүек халыктарҙың, ислам динен кабул итмәҫтән бик күп заман элек, үҙҙәренең боронғо алфавиттары, әҙәби телдәре йәшәгән һәм әҙәби мираҫтары тупланған була.* Т. Баишев.

**ӘҘӘБИЛӘШТЕРЕЛЕҮ** *к. төш. кар.* **әҙәбиләштереү.**

**ӘҘӘБИЛӘШТЕРЕҮ** *к.* **1.** Әҙәбиәт талаптарына яраҡлаштырыу, әҙәби формаға килтереү. *Халыҡ әҫәрен әҙәбиләштереү.* ■ *В. И. Далдең «Башкорттарҙың һыу инәһе» әҫәрен башкорт халыҡ эпосының әҙәбиләштерелгән варианты тип иҫәпләргә мөмкин.* К. Мәргән.

**2.** Әҙәби тел нормаларына яраҡлаштырыу. *Телебеҙҙе әҙәбиләштереү һәм милли булған күркәм ғәҙәттәрҙе һаклау һәр беребеҙҙең өҫтөнә төшкән, һис һүҙһеҙ үтәлергә тейешле бурыс тип хисаплай инем.* М. Ғафури.

**ӘҘӘБИӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Билдәле бер халыҡ, айырым дәүер йәки ғөмүмән кешелек донъяһы тыуҙырған ғилми, әҙәби, философик һ. б. төр әҫәрҙәрҙең йыйылмаһы. *[Уралсылар] союзында булмаған эшселәрҙе союздарға ойоштороп, уларға сәйәси етәкселек итеү менән бергә .. синфи әҙәбиәт, сәйәси пропаганда ла тараткандар.* З. Шәрҡи.

**2.** Тел, һүҙ ярҙамында художестволы образдар тыуҙыра торған сәнғәт төрө. *Әҙәбиәт өлкәһендә эшләү. Әҙәбиәт ғилеме.* ■ *Әҙәбиәт ысынбарлыкты тулы канлы образдарҙа әҙмә-әҙ, тәрән, киң күләмдә .. һүрәтләү көсөнә эйә.* К. Әхмәтйәнов. / Шул төргә ҡараған әҫәрҙәр. *Башкорт әҙәбиәте. Милли әҙәбиәт.* ■ *Фольклор борон заманда, беҙҙең бабайҙар китап эшен белмәгән мәлдә, хәҙерге яҙма әҙәбиәт урынын тоткан.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Ниндәйҙер белем тармағы, махсус мәсьәлә буйынса сыҡҡан бөтә баҫма әҫәрҙәр. *Беллетристик әҙәбиәт. Ғилми әҙәбиәт. Политик әҙәбиәт.*

♦ **Матур әҙәбиәт** тормошто художестволы образдар аша, тел ярҙамында сағылдырған әҫәрҙәр. **СССР әҙәбиәт фонды** яҙыусыларға төрлө материаль һәм көнкүреш ярҙамы күрһәткән ойошма.

**ӘҘӘБИӘТСЕ** *и.* Әҙәбиәт (2 мәғ.) өлкәһендә эшләүсе, әҙәбиәт белгесе. *Тарих, тел, әҙәбиәт институтының әҙәбиәтселәре. // Әҙәбиәтсе ғалим.*

**ӘҘ-ӘҘЛӘП** *р.* **1.** Әҙ-әҙ генә итеп, әҙ күләмдә; аҙ-аҙлап. *Бесәнде әҙ-әҙләп күтәреп ташыу. Әҙ--әҙләп дарыу эсереү.*

**2.** Әкренләп, яйлап. *Әҙ-әҙләп өйрәнеп китеү.* ■ *Был таң ине. Һәм ул, оялғандай, өйгә инә бирҙе әҙ-әҙләп.* Р. Ниғмәти.

**ӘҘӘЙЕҮ** *к.* Күләм йәки һан яғынан кәмеү; аҙайыу. *Утын әҙәйә тип һөйләнә торғас, ул бөтөп куйҙы.* Р. Низамов.

**ӘҘӘЙТЕҮ** *к.* Күләмен йәки һанын кәметеү; аҙайтыу. *Аксаны тотонoп әҙәйтеү.*

**ӘҘӘМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Фекерләй, һөйләй, эш ҡоралдары тыуҙыра һәм хеҙмәт процесында уны файҙалана белгән иң юғары аҡыл көсөнә эйә йән эйәһе; кеше. *Әҙәм балаһы.* ■ *Кулдең күрке камыштыр, әҙәм күрке намыҫтыр, намыҫы булһын батырҙың* (Ҡобайырҙан). *Һығышта иҫән калған дейеү пәрейҙәре, Тереһыу әҙәм затына калмаһын тип, эсеп короткандар икән.* «Урал батыр». / Билдәле бер мөхиткә, йәмғиәткә һ. б. ҡараған, үҙенә хас сифаттары, үҙенсәлектәре булған зат, шәхес. *Ғалим әҙәм. Намыҫлы әҙәм. Якшы әҙәм. Яуыз әҙәм.* ■ *Тайфуров .. элекке партизан, зәһәр уҫал бер әҙәм. Колхозға каршы котко таратыусыларҙы бер карауҙа ук һиҙеп ала ул.* М. Тажи. *Якшы әҙәм билдәһе: асыу менән үсе юк, яман әҙәм билдәһе: асыу менән үсе күп* (Ҡобайырҙан).

**2.** Юғары рухи һәм әхлаҡи сифаттарға эйә булған шәхес. *[Мулла:] Кулымда албаҫты катын аҫрауым, уның шамтыр, әҙәм рәтле булмауы, насар, тәрбиәһеҙ, холоkһоҙ, ахмак, үжәтлеге аркаһында якшылар, ил аҙаматтарына катнашыуҙан айырылдым.* Т. Хәйбуллин.

♦ **Әҙәм аҡтығы** кешене түбәнгә һанап, әрләп әйткәндә ҡулланыла. *Иптәштәренең батып үлеүен үҙ күҙе менән күреп ярҙамға ташланмай сыҙаған әҙәм аҡтығынан .. нимә көтөп була.* З. Биишева. **Әҙәм булыу** 1) аяҡҡа баҫып тормош көтөр хәлгә килеү. *Бахыр, бик этлек менән үҫте инде. ..Ана, тырышкан кеше әҙәм була бит ул! Кандай егет булып киткән.* Ғ. Дәүләтшин; 2) хәл алып шәбәйеү, һауығыу.— *Картәсәйеңдең хәле бик насар, әҙәм була алмаҫ, ахыры.* Һ. Дәүләтшина. **Әҙәмгә һанау** иғтибарға лайыҡ күреү, һанға алыу. *[Кәйнә:] Киленем килгән һайын касып кала. Беҙҙекеләрҙе әҙәмгә һанамауы шулдыр инде.* Ф. Иҫәнғолов. **Әҙәм имәнесе** кеше ерәнерлек, кешенең ҡотон алырлыҡ. **Әҙәм итеү** 1) тормош көтөр хәлгә килтереү, аяҡҡа баҫтырыу. *Баланы әҙәм итеү.* ■ *[Тимерсе — Мәхмуткә:] Бына өлкән улымды килтерҙем: ите-майы — һиңә, һөйәге-тиреһе — миңә. Әрәм итмә, әҙәм ит.* М. Кәрим; 2) ауыр йәки ауырыу хәлдән шәбәйтеү, аяҡҡа баҫтырыу. **Әҙәм калдығы** *кар.* **әҙәм аҡтығы. Әҙәм мәҫхәрәһе итеү** мәсхәрәгә, көлкөгә ҡалдырыу; мыҫҡыллау.— *Былтыр мине кулак тип, кеше көсөнән файҙалана тип, әҙәм мәсхәрәһе иттеләр бит.* Ғ. Дәүләтшин.

**ӘҘӘМИ:** **әҙәми зат** кеше затынан булған йән эйәһе; кеше. *Бер-ике атлауым булды .. эргәлә генә әллә кайҙан калкып сыккан әҙәми зат гөрһөлдәтеп мылтыктан атып та ебәрҙе.* А. Ғирфанов.

**ӘҘӘМСЕЛ** *с. кар.* **кешелекле.** *Бар иҫәбең бик юғары үрелергә, әҙәмсел бер кеше булып күренергә.* С. Ҡудаш.

**ӘҘӘМСЕЛЕК** *и. иҫк.* Кешелек донъяһы.

**ӘҘӘМСӘ** *р.* **1.** Ғәҙәттәгесә, башҡалар кеүек, кешеләрсә. *Әҙәмсә кейенеү. Әҙәмсә кыланыу.* ■ *Тормош иркен, донъя имен. Эшләйем, ижад итәм тиһәң ихтыярың. Әҙәмсә йәшәреңә бөтә мөмкинлек бар.* Ә. Әхмәткужин.

**2.** Әҙәми зат һымаҡ, кеше кеүек. *[Баланың]*

*колағы айыуҙыҡы, бүтән ағзалары әҙәмсә, ти* (Әкиәттән).

**ӘҘӘП** [*ғәр.*] *и.* **1.** Яҡшы ғәҙәт, йола. *Яҙылмаған әҙәп ҡағиҙәләре был [килешмәгән] эштән уны хәҙергә туҡтатып торҙо.* К. Мәргән.

**2.** Кеше араһында үҙеңде тота белеүҙән килгән тыйнаҡлыҡ. *Әҙәпте юғалтыу. Күтәрер инеш абруйын мин әҙәмгә күрк биргән әҙәптең.* А. Игебаев. **Әҙәп һаҡлау** кеше араһында үҙеңде тотоу ҡағиҙәләрен һаҡлап, тыйнаҡлыҡ күрһәтеү. *Үмәр карттың килене Сөйөмбикә әҙәп һаҡлап, бер ни ҙә өндәшмәй.* Ш. Янбаев.

● *Әҙәп барҙа ояг бар.* Мәҡәл.

**ӘҘӘПЛЕ** *с.* Кеше араһында тәртип һаҡлай белеүсән, тәрбиәле. *Әҙәпле кеше. Әҙәпле булыу. // Үҙеңде әҙәпле тотоу.* ■ *Мәрйәм үс йылда яҙыу таныны, әҙәпле бер бала булып, һис ваҡыт ярамаҫ эш ҡылманы.* М. Ғафури. *[Әбей:] Берүк йүнле генә йөрө, әҙәпле генә ҡылан, артыҡ һөйләнмә.* Р. Низамов.

**ӘҘӘПЛЕЛЕК** *и.* Әҙәпле кешегә хас сифат. *Табын бик күңелле үтте. Әллә әҙәплелек һаҡланылар, әллә башҡаларҙан тартындылар инде, .. Харис менән Фәхри ҙә артығын эсмәне.* Б. Бикбай. *Егеттәр баштағы әҙәплелекте юғалтты. Яртылаш башҡортса, яртылаш руссалап анекдоттар һөйләне, хахылдап көлдө.* Ф. Иҫәнғолов.

**ӘҘӘП-ТӘРТИП** *и. йыйн.* Әҙәп һәм тәртип. *Әҙәп-тәртипте белеү. Әҙәп-тәртип һаҡлау.*

**ӘҘӘПҺЕҘ** *с.* **1.** Әҙәп ҡағиҙәләрен һаҡламаған, тәртипһеҙ ҡыланған. *Әҙәпһеҙ кеше. // Әҙәпһеҙ ҡыланыу.* ■ *Эй, баралар, ер дөбөрләтеп, елкенеп, гел әҙәпһеҙ — яҙмаганса ҡыланып.* Ш. Бабич. *Башҡорт ҡыҙҙары бер ваҡытта ла әҙәпһеҙ булманылар, тик бик сая ине улар.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** Насар, әшәке; хаяһыҙ (һүҙ һ. б. тураһында). *Әҙәпһеҙ уйын. Әҙәпһеҙ һүҙ. Әҙәпһеҙ яуап.*

**ӘҘӘПҺЕҘЛЕК** *и.* Әҙәп ҡағиҙәләренә һыймаған эш, тыйнаҡһыҙлыҡ. *Әҙәпһеҙлек күрһәтеү.* ■ *Гөлйөҙөм ололарҙың, бигерәк тә байбисәләрҙең әйтеүенә [табынға] килә һалып ултырыуҙың ҙур әҙәпһеҙлек икәнен яҡшы белә.* Һ. Дәүләтшина. *[Мулла:] Кеше алдында һүҙ һөйләү, көлөү әҙәпһеҙлек була. Аллаға, батшаға итәғәтле булырға кәрәк.* И. Көҫәпҡол.

**ӘҘӘПҺЕҘЛӘНЕҮ** *к.* Үҙеңде әҙәпһеҙ тотоу, тәртипһеҙ ҡыланыу. *Оло кеше алдында әҙәпһеҙләнеү.*

**ӘҘӘП-ӘРКӘН** *и. иҫк. кар.* **әҙәп-тәртип.** *Һин гәзиз эсәң ҡанатынан яңы сыҡҡан бала, изге эсәңдән әҙәп-әркән ала сыҡҡан бала.* Ш. Бабич.

**ӘҘӘР** [*фарс.*] *и. диал. кар.* **битәр**[1]. *Әҙәр ишетеү.*

**ӘҘӘРЛӘҮ** *к. диал.* Битәрләү, тиргәү.

**ӘЖЕКӘЙ** *и.* **1.** Еләкте ҡуйы һөттә ҡуйырғанса ҡайнатып әҙерләнгән тәмле аҙыҡ.

**2.** *диал.* Ҡыҙыл эремсек (*кар.* **эремсек**).

**ӘЖЕР** [*ғәр.*] *и.* Берәй эшкә, мөнәсәбәткә яуап итеп эшләнгән эш, бирелгән хаҡ, түләү һ. б.. *Эштең әжерен биреү.* ■ *[Ғиззәт:] Эшләгәнгә күрә, исмаһам, аҙыраҡ әжере булһа икән.* Х. Ибраһимов. *[Фажиға:] Бына бажаҡайың менән балдыҙҡайыңдың бүләге. .. Бер аҙ әжерен ебәрербеҙ, тигәйнем дә, тыңларға ла теләмәнеләр.* С. Кулибай. **Әжерен ҡайтарыу** эшләнгән эшкә хаҡын түләп йәки шундай уҡ эш менән яуап биреү. *Ҡылған этлегенең әжерен ҡайтарыу.* ■ *[Рәшит:] Алексей алдында мин ғәйәт ҙур бурыслымын. Үҙе иҫән саҡта уның әжерен ҡайтара алманым.* З. Ғәлимов.

**ӘЖРАМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Күк есемдәре (Ай, Ҡояш, йондоҙҙар). *«Был ҡояш, йондоҙ ни нәмә?» — ти инем, мин ишетһәм дә, улар — әжрам, тиеп.* Ш. Бабич.

**ӘЖҮӘЛӘҮ** *к. диал.* Нимә менәндер әүрәтеү. *Әжүәләп йоҡлатыу.*

**ӘЖҮӘФ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Аңһыҙ, наҙан. *Һин кемде ҡурҡытмаҡсы булаһың? Сүп бит һин, әжүәф!* Ғ. Ғүмәр.

**ӘЖӘЛ** [*ғәр.*] *и.* Үлем ваҡыты, үлем. *Әжәл ғазабы. Әжәл көнө. Әжәл тушағе.* ■ *Ғүмерем буйы маңлай тиремде түгеп йыйған малымды нисек ҡыҙғанмай алаһығыҙ. Әжәл ауырыуында ятыр түшәгем дә ҡалмай ҙа баһа.* Ш. Шәһәр. *Ҡартлыҡ килһә, карттар кәкрәйеп, әжәл көтөп ятты алланан.* Б. Вәлит. *Оксптарҙа ятҡан саҡта әжәл көтәбеҙ көн дә* (Бәйеттән). **Әжәл дарыуы** 1) халыҡ ышаныуынса: үлемдән алып ҡала, йәшәтә торған дарыу. *Әжәл дарыуы табылып, терелеп ҡайтып китергә булһам икән, латыш дуҫтарым минән кәм ҡыуанмаҫ ине.* К. Кинйәбулатова; 2) һирәк осрай торған нәмәгә ҡарата әйтелә. **Әжәл етеү** үлер ваҡыт килеү. *[Ғәли:] Быны эштән күреү дөрөҫ түгел, әжәл еткәс, кеше үлә бит!* М. Ғафури. *Бабайға әжәл еткән. Шунан ул өс улын да саҡырып алып, васыят әйткән* (Әкиәттән). **Әжәл зәхмәте** *һөйл.* дауалап булмай тип иҫәпләнгән ауырыуға ҡарата әйтелә. *Атабыҙ Хажи мулла Ялсығолға әжәл зәхмәте иреште.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

◆ **Әжәл тағарағы** *кар.* **тағараҡ**[1].

● *Әжәл етмәй үлем юҡ.* Әйтем.

**ӘЖӘТ** *и. һөйл.* Бурыс, үтес. *Әжәткә биреү.* ■ *Ҙур ағайым .. Терентийҙан ике дисәтинә урак урып түләү шарты менән әжәткә биш бот та ун ҡаҙаҡ арыш алып ҡайтты.* А. Таһиров.

**ӘЗГӘРӘЙ** *и.* Боронғо биш тинлек аҡса.

**ӘЗЕРБАЙЖАН** *и.* Әзербайжаның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттән бер кешеһе (төрки телдәрҙең береһендә һөйләшә). *Әзербайжан халкы. Әзербайжан ҡатыны. Әзербайжан теле.*

**ӘЗМӘҮЕР** *и.* Ҙур кәүҙәле, көслө, таҙа кеше. *— Юҡтыр ундай әзмәүер,— тип, юҡҡа иҫегеҙ китте.* С. Кулибай. *Байгужала, һайлап алған кеүек, киң яурынлы буйсан әзмәүерҙәр йәшәй ҙә баһа.* Я. Вәлиев. **Әзмәүерҙәй** *йәки* **әзмәүер кеүек** кешенең таҙалығына, көсөнә баҫым яһағанда әйтелә. *Әзмәүер кеүек йәштәр.* ■ *Баһа дирҙәр сафына сығып баҫты әзмәүерҙәй Урал ирҙәре.* М. Кәрим.

**ӘЗНӘП** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Гонаһ.

**ӘЗРӘЙЕҮ** *к.* Асыуланып төҫтө боҙоу. *Әзрәйеп ҡарау. Әзрәйеп ҡыҫҡырыу.*

**ӘЗӘЛ** [*ғәр.*] *и. кар.* **әжәл.** *Урал батыр әзәлдең үҙен тотоп үлтереү хаҡында уйлай башлаған, ти.* «Урал батыр».

**ӘЙ** *ымл.* **1.** Ир менән ҡатындың бер-береһенә өндәшеү һүҙе. *Гөлйөҙөм [Айбулаттан]: «Әй, ни*

*булды?» — тип һораны.* Һ. Дәүләтшина. / Кемгәләр өндәшкәндә, мөрәжәғәт иткәндә әйтелә; эй. *Ҡайҙа Юлтый? Эй! Юлтый, ин әле бында.* Т. Хәйбуллин.

2. Һүҙ йәки һөйләм аҙағында килеп, шатланыу, һоҡланыу, хуплауҙы һ. б. белдергәндә әйтелә. *Рәхәт, эй! Аптырарлыҡ, эй!* ■ *Минең күңел иләҫ-миләҫ булып китте, эй!* Т. Йәнәби. *[Йәнтүрә:] Помидорҙар шәп бит, эй!* С. Агиш.

3. Нимәгәләр үкенгәнде, көйөнөп борсолғанды, һыҙланғанды һ. б. белдергәндә әйтелә. *[Гөлйөҙөм:] Әй, Яланбикә, ашаныулар бит башты.* Һ. Дәүләтшина.

4. Һанға һуҡмағанды, мыҫҡыллы мөнәсәбәтте белдергәндә әйтелә. *Әй, тыңлама шуны! Әй, бөтмәҫ шуларҙың эше!*

5. Нимәнелер онотоп, яңылыш әйтеп, ҡапыл иҫкә төшөргәндә әйтелә.— *Үҙе өйҙә. Әй, өйҙә юҡ, тирмәнгә китте.* Һ. Дәүләтшина.

6. Халыҡ йырҙарында ижек һанын тултырып, эмоциональлек биреү өсөн ҡулланыла. *Әфлисун да менән әй бер лимон япраҡ ярамикән көҙҙән һуң* (Халыҡ йырынан).

♦ **Әй эттәгенәһе** *кар.* **эттә** [2].

**ӘЙБЕР** *и. диал. кар.* **нәмә** 1. *Әйбер һатып алыу.*

**ӘЙБӘТ** *р. кар.* **һәйбәт.** *Бик әйбәт. Әйбәт булыу. Әйбәт эшләү.*

**ӘЙБӘТЛӘҮ** *ҡ. кар.* **һәйбәтләү.**

**ӘЙҘҮК** *өнд.* Килгән кешене ҡаршы алып, түргә үтергә саҡырғанда әйтелгән һүҙ. *Шәхми бай: — Әйҙүк, түрә, хуш килдегеҙ,— тип, [инспекторҙы] ҡаршы сығып алды.* Т. Йәнәби.

**ӘЙҘҮКЛӘҮ** *ҡ.* Ихласлыҡ белдереү, ихлас күңелдән өндәшеү. *Әйҙүкләп ҡаршы алыу. Әйҙүкләп тороу.* ■ *[Ғәлләмов]: — Рәхим итегеҙ, түрҙән уҙып ултырығыҙ,— тип яҡты йөҙ менән әйҙүкләп Рәмзиә ханыма ултырырға тәҡдим итте.* Х. Зарипов. *Ҡоҙаларҙы әйҙүкләп өйгә алып керәләр.* Р. Солтангәрәев.

**ӘЙҘӘ** *ымл.* 1. Ҡайҙалыр барырға саҡырғанда әйтелә. *«Әйҙә, туташ, беҙ ҙә йөрөйөк», тигән булдым.* Т. Йәнәби. *Сәйҙел .. әйҙә сыҡтыҡ, бөгөн Артекка экскурсияға барып ҡайтайыҡ.* Ғ. Сәләм. / Ниндәйҙер эшкә өндәгәндә, саҡырғанда әйтелә. *Әйҙәгеҙ, улай булһа, папирос тартып ебәрәйек.* Д. Юлтый. *[Һөнәрсе:] Әйҙә, бергәләп эҙләнәйек, бәлки бығаса бер кем дә эшләй белмәгән көршәктәр яһарбыҙ.* З. Биишева.

2. Нимәгәләр ыңғайлыҡ, ризалыҡ белдергәндә әйтелә. *Атҡа менегеҙ, ирҙәр, ағалар, асылһын, әйҙә, иҫке яралар.* Салауат Юлаев. *[Батша:] Үҙегеҙ белеп алығыҙ, әйҙә* (Әкиәттән).

3. Ҡыҙыу, ярһыу эш-хәрәкәтте белдергәндә әйтелә. *Әйҙә, көн һайын илау, үпкәләү,* Б. Бикбай. *Әйҙә, атайҙың китаптар менән тулған шүрлеген аҡтарып бөттөм бутап.* Ш. Бабич.

4. Мыҫҡыл ҡатыш түбәнһетеп ҡарағанды белдергәндә әйтелә. *[Ғүмәр:] Әйҙә, өйрәнһен, ул [Сәлих] бит красный коммерсант, уға торговый эштең бөтәһен дә белергә кәрәк.* С. Агиш. *Көлһә көлһөндәр.., әйҙә көлһөндәр, уларҙың көлгәненән көләйем.* Ш. Бабич.

**ӘЙҘӘЛӘҮ** *ҡ.* Әйҙә лә әйҙә, тип, нимәләр эшләргә, ҡайҙалыр барырға саҡырыу, өндәү. *Әйҙәләп алып китеү.* ■ *Яҙ .. беҙҙе һауа, ҡояш нурҙары тышҡа әйҙәләне.* Н. Ҡотдосов. *Әсәйем уны [Гөлсәғиҙә инәйҙе] әйҙәләп сәйгә ултыртты.* Р. Аҙнағолов.

**ӘЙҘӘЛӘШЕҮ** *ҡ. урт. кар.* **әйҙәләү.** *Мөхәррәм ҡарт теге йәки был эште нисек эшләргә икәнен күрһәтеп, ҡыҫҡа ғына бойороҡ биреп, әйҙәләшеп йөрөнө.* Ә. Бикчәнтәев.

**ӘЙҘӘҮ** *ҡ. кар.* **әйләү** [1]. *Көрәшкә әйҙәү.*

**ӘЙКӘЙЕМ** *и. ирк.* Дуҫҡа, һөйгән йәргә өндәшкәндә әйтелә. *[Гөлгөнә — Катюшаға:] Ҡасайыҡ бынан, әйкәйем.* Д. Исламов. *Ярай, ярай, әйкәйем, мин бер һүҙ ҙә әйтмәйем.* Д. Юлтый.

**ӘЙЛЕ** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**ӘЙЛЕ-БАШЛЫ** *с. диал.* Башлы-күҙле. *Әйле-башлы итеү. Әйле-башлы булыу.*

**ӘЙЛЕ-ШӘЙЛЕ** *р. һөйл.* 1. Ни эшләргә белмәй, аптырап. *Әйле-шәйле булып тороу.* ■ *Шулай әйле-шәйле йөрөгәндә .. Мәсгут кантисполкомы конюхтары осрайҙар ҙа [Йосопто] үҙҙәре янында ҡалырға өндәйҙәр.* Н. Ҡәрип.

2. Күңел һалмай, илке-һалҡы ғына. *Әйле-шәйле эшләү. // Әйле-шәйле кеше.*

**ӘЙЛӘН-БӘЙЛӘН** *и.* Балалар уйыны (ҡулға-ҡул тотоношоп, түңәрәк яһап, йырлап, әйләнеп уйнайҙар). *Әйлән-бәйлән уйнау.*

**ӘЙЛӘНГЕЛӘҮ** *ҡ.* Нимәлер тирәләп күп йөрөү, ҡабат-ҡабат әйләнеү. *[Егеттәр] көнө буйы тау-таш, урман араһынан әйләнгеләп йөрөй торғас, үҙебеҙҙең ауыл тапҡырына килеп сыҡҡандар.* Ф. Иҫәнғолов.

**ӘЙЛӘНДЕРЕП-ТУЛҒАНДЫРЫУ** *ҡ.* Төрлө яҡҡа, төрлөсә әйләндереү. *Әйләндереп-тулғандырып йөрөтөү.* ■ *Мин көршәкте әйләндереп-тулғандырып һәлмәкләп ҡарайым.* З. Биишева.

**ӘЙЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* 1. Нимәнелер үҙ күсәре тирәһендә хәрәкәткә килтереү; өйрөлтөү. *Тәгәрмәсте әйләндереү.* ■ *Шәмсиә ҡулындағы орсоғон .. әйләндереп ебәреп, йомшаҡ, һарғылт дөйә йөнөн һуҙып-һуҙып иләй ине.* Һ. Дәүләтшина. / Хәрәкәткә килтереү, эшләтеү (ҡорал, механизм һ. б.). *Сипаратты әйләндереү. Елгәргесте әйләндереү.* ■ *Наборщиктар етешмәй, печать машинаһы иҫке, етмәһә, ҡул менән әйләндерергә кәрәк.* Б. Бикбай. / Бер урын тирәләп хәрәкәт иттереү; өйрөлтөү. *Әйләндереп бейетеү.* ■ *Таминко, .. Буранбайҙы тотоп әйләндереп йөрөтә башланы.* Д. Юлтый. *Рәхимә .. еҙ аҫҡыстарҙы шалтыратып ҡулында әйләндереп алды ла алдына һалды.* Һ. Дәүләтшина.

2. Кемделер, нимәнелер бер яғынан икенсе яғына бороу, икенсе яҡҡа ҡаратыу. *Кәнәстең алдын артҡа әйләндереп ҡуйыу.* ■ *Әмирханов .. ишектәге ҡатырғаның «магазин ябыҡ» тигән яғын әйләндереп ҡуйҙы.* С. Агиш. *Йәнлекте әйләндереп-әйләндереп ҡарай торғас, муйынындағы бер төймәгә күҙе төшә быҙың* (Әкиәттән). / Нимәнеңдер аҫтын өҫкә ҡаратыу, түңкәреү. *Әйләндереп ҡуйыу. Көслө тулҡын кәмәһен әйләндергән.* ■ *Ҡадир икенсе ярыәне арҡаһына әйләндереп һалды.* Б. Бикбай.

3. Нимәнеңдер эсен тышҡа йәки уңын һулға сығарыу. *Пальтоны әйләндереп тегеү. Тоҡто әйләндереү.* ■ *[Шарап] кеҫәләрен әйләндерә*

*һарандың.* М. Кәрим. *Кейеҙбай кеҫәләрен ҡапшай, әйләндереп ҡарай* (Әкиәттән).

**4.** Килгән, киткән яҡтан кире бороу. *Әсе генә буран, ай һырғаҡ ел, әйләндереп булмай йылҡымды* (Халыҡ йырынан).

**5.** Кемде йәки нимәнелер уратып алыу; түңәрәтеү, уртала ҡалдырыу. *Өйҙө ситән менән әйләндереү. Табынды әйләндереп һый теҙеү.* ■ *Урталағы булмәлә, оло тәҙрә ҡаршыһына ҡуйылған өҫтәлде әйләндереп ултырып, байҙың дүрт балаһы уҡый.* Һ. Дәүләтшина. *Балалар .. уҡытыусыны әйләндереп алдылар, бер-береһен этәрешеп, рәсем дәфтәренә күҙ һалдылар.* М. Тажи. / Тирә-яҡтан уратып алып ҡамау, эстә ҡалдырыу. *Беҙҙең ротаны демонстранттарҙы әйләндереп алыу өсөн бер рәтләп площадка алып киттеләр.* Д. Юлтый.

**6.** Кемде йәки нимәнелер уратып йөрөтөү, йөрөтөп сығыу. *[Колмырҙа:] Көтөүсе, һиңә әйтәм: бынан түбән көтөүҙе Хан ташынан әйләндереп, Аҡтау битенә алып барып көт.* Т. Хәйбуллин. / *күсм.* Һүҙҙе, иғтибарҙы бер үк нәмәгә ҡайтарғанды, йүнәлткәнде аңлата. *[Үрәтниктең] бына Юлия Ивановна тураһында ҡаты төпсөнөүе мине бик ҙур хафаға һалды, әйләндерә лә уның исемен килтереп сығара.* Һ. Дәүләтшина.

**7.** Төбәү килештәге исемгә эйәреп а) сифат яғынан үҙгәрткәнде аңлата. *Һыуҙы боҫҡа әйләндереү.* ■ *Күк дүнән .. тау башын таҡырайтып, ҡаҡҡа әйләндереп бөткән.* «Заятүләк менән Һыуһылыу»; б) кемдеңдер холҡон, ҡылығын үҙгәрткәнде аңлата. *Йыуашҡа әйләндереү.* ■ *Тәрбиәләй мине таш ҡала. Эйе, быпа ошо таш ҡала әйләндерҙе мине башҡаға.* Ғ. Амантай; в) ғәмәлдәге хәлен, булмышын үҙгәрткәнде аңлата. *Һаҙлыҡты баҡсаға әйләндереү;* г) эш-хәлдең асылына икенсе төҫ, мәғәнә биргәнде аңлата. *Уйынды ысынға әйләндереү. Һүҙ көрәштереүҙе талашҡа әйләндереү. Ысынды мәрәкәгә әйләндереү;* д) нимәнелер икенсе бер нәмәгә алмаштырғанды аңлата. *[Өйрәнсек — Һөнәрсегә:] Һин гәҙәттәгесә көрешәктәр эшләйһең, ә мин уларҙы аҙыҡҡа, кейемгә әйләндерәм.* З. Биишева.

**8.** Халыҡ ышаныуынса һәм экиәттәрҙә: ниндәйҙер тылсымлы көс ярҙамында ниндәйҙәр бер һүрәткә, төҫкә индереү, кем йәки нимәгәлер әүерелдереү. *Кешене эткә әйләндереү.* ■ *Кесе ҡыҙ үҙенең нәмәләрен баҡыр һандыҡҡа тейәп, йорт-мөлкәтен баҡыр күкәйгә әйләндереп алып киткән* (Әкиәттән).

**9.** Бер телдән икенсе телгә күсереү, тәржемә итеү. *Фольклор инглиз һүҙе булып, башҡортсаға әйләндергәндә «халыҡ ижады», «халыҡ тапҡырлығы» тигән мәғәнәләргә тура килә.* Ғ. Амантай.

**10.** *күсм.* Уйлап, эште оҫта итеп башҡарып сығыу, хәл итеү. *Хәҙер, колхоз булғас, күмәк кул өсөн кар тотоу эшме ни ул, әйләндереп сығарып булыр.* Б. Бикбай.

♦ **Башты әйләндереү** 1) башты, зиһенде бутау. *Ни өсөн инде һис бер мәсьәләгә бәйләнмәгән Хажи анекдоттары менән башты әйләндерергә!* С. Агиш; 2) һушты алғандай итеү, иҫаңгерәтеү. *Танауыма килеп бәрелгән хуш еҫтәр, бөтә тәнемә таралып, башымды әйләндерҙе. Тәмәкене һыуһап тартҡан саҡта, ниңәлер шулай баш әйләнә.* Н. Мусин; 3) маҡтап үҙһендереү, маһайтыу. *Маҡтарға, ҡупайтырға кәрәк йәш кешене. Ә маҡтау шайтандың да башын әйләндерә икәнен Саҡай бик яҡшы белә.* Б. Бикбай; 4) әүрәтеп, үҙенә ҡаратып алыу. *[Бибикамал:] Быпа өсөнсө көн инде [Гәрәй] ярты төндә генә ҡайта. Әллә бөтөнләй өйҙән биҙҙе, әллә .. береһе башын әйләндерҙеме?* А. Карнай. **Күҙҙе** (*йәки* **күҙҙең ағын**) **әйләндереп** 1) күҙҙе ҙур асып; 2) асыу белдереп, ағайып.

**ӘЙЛӘНДЕРЕШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **әйләндереү** 1—3. *Башҡортсаға әйләндерешеү. Сипарат әйләндерешеү. Токто әйләндерешеү.*

**ӘЙЛӘНЕП-ТУЛҒАНЫУ** *к.* Төрлө яҡҡа, төрлөсә әйләнеү. *Айыуҙың ике балаһы әйләнеп-тулғанып, тәкмәсеп ала.* С. Кулибай.

**ӘЙЛӘНЕҮ** *к.* **1.** Үҙ күсәре тирәһендә хәрәкәт итеү; өйрөлөү. *Тәгәрмәс әйләнә.* ■ *Өйҙә ҙыр әйләнгән орсоҡ тауышына тукылдатып сапҡан балта тауышы ҡушыла.* Т. Хәйбуллин. *Ел тирмәне елпеү елдәргә ҡанаттарын болғап әйләнә.* Ғ. Амантай. / Бер урын, нөктә тирәләп хәрәкәт итеү; өйрөлөү. *Индрил таҡмаҡ әйтте, мин, бер-ике әйләнеп, бейеп алдым.* Д. Юлтый. *Турат басҡан урынында бер нисә ҡат әйләнде.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Бер яҡтан икенсе яҡҡа боролоу, тәү торған хәлде үҙгәртеү. *Йөҙ түбән әйләнеү. Салҡан әйләнеү.* ■ *Фәхри көрәшселәргә хас таһыллыҡ менән әйләнеп, егеттең өҫтөнә төштө.* Б. Бикбай. *Зыя төн буйына йоҡлай алманы, тегеләй ҙә, былай ҙа әйләнде.* М. Тажи. *Егет ҡамсы менән бер һуға — ҡыҙ ҡуҙғалып ҡуя, ике һуға — ҡыҙ икенсе яғына әйләнеп ята* (Әкиәттән). / Аҫ яғы өҫкә ҡарау, ҡапланыу. *Әйләнеп төшөү. Кәмә әйләнгән. Күнәк әйләнеп һыуы түгелгән.*

**3.** Нимәнеңдер эсе тышҡа йәки уң яғы һулға сығыу. *Күлдәктең тиҫкәре яғы әйләнгән. Бишмәттең кеҫәһе әйләнеп сыҡҡан.*

**4.** Кемгәләр, нимәгәләр йөҙ йәки арт менән боролоу. *Әйләнеп ҡарау.* ■ *[Ғәйзулла бабай] ҡараңғыла күренмәгән Алайғыр түбәһенә ҡараны, шунан миңә әйләнде.* Н. Мусин. *Буранбай .. Таминьконың шаяртыуына ҡаршы: — Ҡуй әле, Таминько, шаярма әле! Минең бер ҙә шаярғым килмәй,— тип әйләнеп китте.* Д. Юлтый. / Ҡайҙалыр барған, киткән, ебәрелгән һ. б. ерҙән кире боролоу, кире килеү. *Тыуған илгә әйләнеп ҡайтыу.* ■ *Мин техникум менән бөтөнләйгә хушлашам. Ҡабат бер ваҡытта ла бында әйләнеп килмәҫкә китәм.* М. Тажи. *Аръяҡ алыҫ. Әйләнергә бирьяҡ та алыҫ ҡала. Киләм йылға уртаһында.* Р. Бикбаев. *Иҫән булһаҡ бер ҡайтырбыҙ тыуған илгә әйләнеп* (Халыҡ йырынан).

**5.** Нимәнелер түңәрәтеп ураү, түңәрәк яһау. *Өмәселәр бер ҙур табын булып әйләнеп ултырҙылар.* Һ. Дәүләтшина. *Планеталар әйҙә әйләнһендәр — мин һөйләйем күҙҙәр хаҡында.* М. Кәрим. / Баш осонда, өҫтә өйрөлөп, түңәрәтеп осоу. *Ҡыйғас ҡанатлы аҡсарлаҡтар: — Ҡайт! Ҡайт! — тип, әсе ҡысҡырып, Юламан ҡарттың баш осонда әйләнде.* З. Биишева. *Бөркөт башта тауҙы әйләнеп осоп йөрөнө, унан ҡапыл йомолоп, түбән төшә башланы.* М. Тажи. / Бер тирәлә

күп йөрөү; ураланыу, сыуалыу. *Магазин тирәһендә әйләнеү. Һатыусылар тирәһендә әйләнеү.* / *күсм.* Һүҙҙе, иғтибарҙы бер үк нәмәгә ҡайтарып ҡалдырыуҙы аңлата. *Әйләнәм дә һөйгән илем тимен, әйләнәм дә шашып һөйөнәм.* З. Ҡотип.

**6.** Төбәү килештәге исемгә эйәреп а) сифат яғынан үҙгәргәнде аңлата. *Саңға әйләнеү. Ташҡа әйләнеү. Һыу быуға әйләнде.* ■ *Диңгеҙ берсә .. утлы өйөрмә булып күккә үрелгән, берсә иргән ҡурғашҡа әйләнеп, тамуҡ утындай урғылған.* З. Биишева; б) холоҡ, ҡылыҡ яғынан үҙгәргәнде аңлата. *Баҫалҡыға әйләнеү. Уҫалға әйләнеү;* в) ғәмәлдәге хәле, булмышы үҙгәргәнде аңлата. *Мәсет клубҡа әйләнде. Түңәрәктәр музыка мәктәбенә әйләнде;* г) эш-хәлдең асылы икенсе төҫ алғанды аңлата. *Хыял ысынға әйләнде.* ■ *Бәхәстең аҙағы тағы ла уйын-көлкөгә әйләнә.* Д. Юлтый; д) тәбиғәт күренешендәге үҙгәреште аңлата. *Көндәр сыуаҡҡа әйләнде.*

**7.** Халыҡ ышаныуынса һәм әкиәттәрҙә: ниндәйҙер тылсымлы көс ярҙамында билдәле бер һүрәткә инеү, кем йәки нимәгәлер әүерелеү. *Зәрҡум уйлап тормаған, бер йыланға әйләнгән дә, ярыҡ-маҙар юҡмы, тип, сығыр тишек эҙләгән.* «Урал батыр». *Күлгә инеү менән ете аҡҡош береһе береһенән матур ете ҡыҙға әйләнгән* (Әкиәттән).

♦ **Аҫты өҫкә әйләнеү** 1) ҡапланыу, түңкәрелеү; 2) бик ныҡ буталыу, пыран-заран килеү. *Был йәһәннәм, был һуғыш, был ҡанлы вәхшәт — ихтилал, ер-йыһан аҫты-өҫкә әйләнмәйсә, бөтмәҫ, ихтимал.* Ш. Бабич. **Баш әйләнеү** 1) иҫ үңгәләп, күҙ алдындағы нәмәләр әйләнгән һымаҡ булыу. *Баш әйләнеп ҡолау*; 2) аңҡы-тиңке булыу, ҡаңғырыу. *Сыр-сыу тауыштан баш әйләнеп бөттө*; 3) кемгәлер әүрәп, ауара булыу. *[Ҡыҙҙан] ҡотолғас, баш әйләнеүе бөттө.* Т. Йәнәби. **Кире әйләнеү** үткән нәмә ҡабаттан булыу, ҡабатланыу. *Арыҫланғәле, һин .. беләһеңдер инде, ошо донъялар кире әйләнгәндәй күренмәйме?* Ғ. Дәүләтшин. **Әйләнгән һайын** *ҡар.* **һайын. Әйләнеп ҡарамаҫлыҡ булыу** *ҡар.* **ҡарау. Әйләнеп сыҡҡыһыҙ** 1) өй йыһазының бай, күп булыуына ҡарата әйтелә. *Өйөндә ҡаралды әйләнеп сыҡҡыһыҙ*; 2) боларып ятҡан нәмә күп булғанда әйтелә. *Өйө бола, әйләнеп сыҡҡыһыҙ.*

**ӘЙЛӘНЕШ** *и.* **1.** Нимәнеңдер үҙ күсәре тирәһендә йәки йомоҡ һыҙыҡ буйынса яһаған тулы бер хәрәкәте. *Бер әйләнеш.* ■ *Ҡапты йәбештереүсе станоктар .. минутына 135 әйләнеш яһап, сәғәтенә 7 йәшник продукция бирә.* Ә. Ихсан.

**2.** Ниндәйҙер эштәге ҡабатланған тулы бер цикл. *Капитал әйләнеше.* ■ *Колхозда элек туғыҙ баҫыуҙан торған сәсеү әйләнеше булған, ләкин ул һуғыш ваҡытында боҙолған.* Ә. Вәли. / Нимәнелер файҙаланғанда тулы цикл тәшкил иткән эштәр, операциялар. *Ҡараптар әйләнеше.* ■ *Бәләкәй станциялар Шөгөр, Бензин, Загородный .. ҡала эсендәге промышленность предприятиеларының йөк әйләнешен хеҙмәтләндерә.* М. Хисмәтов.

**3.** Етештереү һәм табыш алыу маҡсатында башҡарылған сауҙа, промышленность һ. б. операциялары. *Әйләнештәге аҡса. Әйләнеш фонды. Әйләнеш һалымы.* ■ *Дәүләт банкаһы гөмүмән бөтә СССР-ҙа аҡса әйләнешен тигеҙләүсе регулятор булып тора.* «Совет Башҡортостанының ун йылы», 1929.

**ӘЙЛӘНЕШЕҮ** *ҡ.* Күмәкләп әйләнеү (1, 2 мәғ.). *[Йәштәр] аҡрын ғына әйләнешә башланылар, .. бер ҡыҙ йыр башлап ебәрҙе.* Т. Йәнәби.

**ӘЙЛӘНМӘ**[1] *и.* Түбә таҡтаһы аҫтынан өйҙө уратып элгән тар ғына шаршау. *Сигелгән әйләнмә. Әйләнмә элеү.*

**ӘЙЛӘНМӘ**[2] *и. диал.* Боролма, бөгөл.

**ӘЙЛӘНМӘЛЕ** *с.* Күсәрендә әйләнеп торған. *Әйләнмәле ҡапҡа.* ■ *Ана урам мөйөшөндә игландар өсөн яһалған әйләнмәле витрина. Унда бөгөн беҙ барасаҡ спектаклдең афишаһы йәбештерелгән.* С. Агиш.

**ӘЙЛӘНСЕК** *и.* Малдың (ғәҙәттә һарыҡ малының) мейеһе таҫма селәүсендәр менән зарарланыуҙан килгән ауырыу. *Әйләнсек ауырыуы.* // *Әйләнсек һарыҡ.* ■ *Малың теүәлләгәнең бармы?.. Анау көндө бер һарыҡ әйләнсек булып йөрөй ине, шул ятып-нитеп ҡалмағанмы?* Т. Хәйбуллин.

**ӘЙЛӘНӘ** *и.* **1.** Нимәнелер ситтән, тыш яҡтан ураткан шартлы һыҙыҡ; урата. *Урмандың әйләнәһе.* ■ *Күлдең .. әйләнәһе ун биш километр.* Ҡ. Даян. *Йәйыҡбай ҙа тигән ай убаның әйләнәһе алты саҡырым* (Халыҡ йырынан).

**2.** Нимәләр тирәһендәге урын. *Өй әйләнәһе.* ■ *Бесән өҫтөнә ултырып, яурынға ҡыҫҡа тундарҙы һалып, ут әйләнәһендә ярты сәғәт самаһы серем итеп алдыҡ.* С. Кулибай. *Яна шаулап утындар, әйләнә көндөҙҙәй яҡты.* М. Ғафури.

**3.** Яҡын ара, тирә-яҡ; урата. *Уңмаған һин, әйләнәңде ҡаплаған ғәфләт сире.* Ш. Бабич. *Әйләнәмдә абағалы урман, уйпы ерҙәр, бөҙрә саукалар.* А. Игебаев. / *күсм.* Кемделер уратып алған, кемдер аралашҡан кешеләр төркөмө. *Кәрим бай әйләнәһендәге бүтән типтарҙа үҙенсәлекле авантюристар итеп һүрәтләнә.* Х. Ибраһимов.

**4.** Бер йыл, тәүлекте һ. б. эсенә алған ваҡытҡа ҡарата әйтелә. *Тәүлек әйләнәһе.* ■ *Александра Дмитриевна эшкә уңған, ире һымаҡ, асыҡ күңелле ҡатын. Уның тоҙлаған кәбеҫтә, ҡыяр, помидорҙары йыл әйләнәһенә өҙөлмәй.* Б. Бикбай. *Ул [Мәғфүрә] йыл әйләнәһенә бер ҡайтып кермәһә лә Ҡотлоярын өҙөлөп һағынғаны юҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘЙЛӘНӘ-ТИРӘ** *и. йыйн.* **1.** Яҡын тирә, тирә-яҡ. *Һөнәрсе тауҙар, урмандар гиҙгән. Әйләнә-тирәне, ағас-ташты ентекләп өйрәнгән.* З. Биишева.

**2.** *с. мәғ.* Яҡын тирәлә булған, аралашҡан. *Хәрби шартта кешеләр бер-береһенә тиҙ эйәләшә. .. Мин дә шунда уҡ әйләнә-тирә офицерҙар, һалдаттар менән танышып өлгөрҙөм.* С. Кулибай.

**ӘЙЛӘҮ**[1] *ҡ.* **1.** Малды тәртип менән өйөрөп ҡыуыу. *Беҙ сабыштыҡ-сабыштыҡ та, йылҡыларҙы юлға әйләп, өйөр артынан атлатып ҡына киттек.* Ш. Шаһәр. *Ҡарт әсәйем һыуға малын әйләй, ҡарт атайым ҡайтты бесәндән.* Х. Ғәбитов. / *күсм.* Мал урынына ҡыуып йөрөтөү, өйөрөү. *[Таңдыса:] Тас айыуҙай алышып, кем уҙарҙан*

*сабышып, унарын унарлап әйләгән, йөҙәрен йөҙәрләп әйләгән. «Ҡуңыр буға». [Салауат] ҡаршыһына килгән дошмандарын ҡуй һарығы кеүек әйләне* (Халыҡ йырынан).

**2.** Күмәкте нимәгәләр өндәү, саҡырыу; эйҙәләү. *Салауаттың ҡурҡыу белмәҫ ҡарашы, түбән төшмәҫ ҡылысы, эйелмәҫ ғорур башы, таштарҙы иретер һүҙе уларҙы еңеүгә әйләй.* Ә. Вахитов.

**3.** *иҫк. ҡар.* **әйтеү**[1] 8. *Мөнәжәт әйләнем, һәрҙәм нәбиҙәрҙән ҡылып ярҙам* (Мөнәжәттән).

**ӘЙЛӘҮ**[2] *ҡ. иҫк. кит.* Итеү. *Ҡабул әйләү. Әмер әйләү.* ■ *[Зариф — һалдаттарға:] Беҙ һеҙгә хәйерле сәфәрҙәр теләп, хоҙай тәғәләнән юлығыҙҙы ҡыҫҡа әйләүҙе теләп ҡалабыҙ.* Н. Ҡәрип. *Артҡа ҡасыуҙан файҙа юҡ, дошмандарҙы шат әйләп* (Халыҡ йырынан).

**ӘЙСЕЛӘҮ** *ҡ. диал.* Байрамсылау. *Айыт көнө лә килеп етте. Әйселәргә тип урамға сыҡҡан Хәкимдең балалары өсөһө өс яҡҡа йүгерҙе.* Я. Хамматов.

**ӘЙТЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **әйтеү** 1—4, 7—9. *Киҫәтеп әйтелгән һүҙ. Нәҙер итеп әйтелгән әйбер. Көйләп бәйет әйтелде.*

**ӘЙТЕЛЕШ** *и.* Өндө, һүҙҙе әйтеү рәүеше; өндөң, һүҙҙең яңғырашы. *Хатта яңы һүҙҙең әйтелешенә тиклем уға [Емешкә] мәҙәк тойола.* З. Биишева.

**ӘЙТЕМ**[1] *и.* **1.** Имләгәндә, арбағанда йәки уйында уҙаҡлашҡанда һамаҡлап әйтелгән һүҙ (һәр бер юлы 7—12 ижектән тора). **Әйтем әйтеү** һамаҡлау. *Әйтем әйтмәй нишләйем, әйтә торған һүҙем бар, ҡолаҡ һалың һүҙемә* (Ҡобайырҙан).

**2.** Билдәле бер тәртиптә ойошҡан һүҙҙәр төркөмө. **Идиоматик әйтем** составы һәм төҙөлөшө тотороҡло булған, мәғәнә яғынан бер бөтөн әҙер телмәр берәмеген тәшкил иткән, лексик яҡтан ойошҡан һүҙбәйләнеш. **Фразеологик әйтем** өлөштәре бер-береһенә мәғәнәүи яҡтан ныҡ бәйләнгән, ләкин дөйөм мәғәнәһе үҙен төҙөгән һүҙҙәрҙең мәғәнәһенән сыҡмаған һүҙбәйләнеш.

**3.** Башҡорт фольклорында тормоштоң айырым бер күренешенә ситләтеп, кинәйәләп йәки образлы итеп баһа биргән бөтөн һөйләм булып ойошоп етмәгән тотороҡло һүҙбәйләнештән торған жанр. *Айбулат сходтарҙа тороп һөйләй башлаһа, [Ныяҙғол] йәнен ҡулына ала, эсенән һаман да бер әйтемде ҡабатлай: «Һе, яр аҫтынан яу сыҡҡан, көтөү көтөп йөрөп тә кеше шулай үткерләнер икән!»* Һ. Дәүләтшина.

**ӘЙТЕМ**[2] *и.* Кәләп баҫмаһының өс йәки дүрт ептән торған бер берәмеге. *Кәләптең тулы баҫмаһында илле әйтем була.*

**ӘЙТЕМЛӘҮ** *ҡ.* Шиғри һүҙҙе көйгә һалмай һамаҡлап әйтеү. *Китер алдан ҡыҙҙың еңгәһе әйтемләп, башына һуға: «Ҡабағандан ҡаптырма, тибәгәндән типтермә; тумырғаның май булһын, тулғатҡаның ул булһын».* М. Буранғолов.

**ӘЙТЕМСӘК**[1] *и.* Кәләш итеп әйттергән ҡыҙ. *[Әлибай] үҙенең әйтемсәге Һөйәрбикәне алып, түй яһаны.* Ғ. Ибраһимов.

**ӘЙТЕМСӘК**[2] *и. ҡар.* **әйтем**[1] 1. *Әйтемсәк әйтеү.*

**ӘЙТЕРЛЕК** *с.* «Тип» һүҙе менән бергә килеп, үҙенән алда килгән һүҙгә күләме, һаны яғынан яҡын булыуҙы; сама менән әйтелеүҙе белдерә. *Бөтәһе лә тип әйтерлек эштә. Бүре хәтле тип әйтерлек эт.* ■ *Ҡайтҡас, ҡыш буйына тип әйтерлек эшһеҙ тик йөрөнөм.* Т. Йәнәби.

**ӘЙТЕРҺЕҢ(ДӘ)** *мөн.* Һүҙҙе, фекерҙе дөрөҫләгәндә, уға ниндәйҙер баһа биргәндә әйтелә. *Пак матурлыҡ менән ҡыш йылмайып, бар донъяны биҙәй, шатлана. Әйтерһең дә, бөтә ҡайындарҙы көмөш туҙан менән ҡаплаған.* М. Хәй.

**ӘЙТЕҮ**[1] *ҡ.* **1.** Уйҙы, фекерҙе тел менән башҡаларға еткереү, хәбәр итеү; нимәләр һөйләү. *Рәхмәт әйтеү. Тост әйтеү. Һүҙ әйтеү. Әйтеп биреү.* ■ *«Ҡана, булмаһа, үҙем әйтәйем әле бер-ике һүҙ»,— тип Ғариф ҡарт урынынан торҙо.* Б. Бикбай. *[Зыя:] Ҡабатлап әйтәм, .. был эштә минең һис бер ҡатнашым юҡ.* М. Тажи. *Сәйҙелни әйтергә теләгәндер, бәлки, тағы бала тураһында.* Ғ. Сәләм./ Берәй эште, үтенесте, хәбәрҙе һ. б. кеше аша кемгәләр еткереү, тапшырыу. *Күп итеп сәләм әйтеү.* ■ *[Взвод командиры:] Күптән хәбәр бирелде, саф буйынса хәбәр итергә ҡушылды. Һеҙгә әйттеләрме?* Д. Юлтый. *Биктимер баяғы фатир хужаһы әбейҙе батшаға ебәрә. «Һауыҡтырыусы бар тип әйт»,— ти* (Әкиәттән).

**2.** Нимәләр тураһында аңлатыу, өйрәтеү. *Фронтҡа яңы килгән ҡайһы бер новобранецтар аңраға әйләнәләр, ашамай, эсмәйҙәр. Әйткәнде аңламайҙар.* Д. Юлтый. *Бер ҙә шикһеҙ һиңә аҡылың әйтер: — Большевиктар юлы хәйерле,— тип.* Ш. Бабич. *Яҡшы ғына әҙәм шуны әйтер: айырылмайыҡ тыуған илдән тип* (Халыҡ йырынан)./ Алдан иҫкәртеү, киҫәтеү. *Әйтеп тороу. Әйтеп килеү.* ■ *Ауылдарҙы йөрөп сығыу Ҡотлоярға тапшырылды. Тик был эште башлар алдынан кәңәште Айбулат менән ныҡ төйөнләргә кәрәклеген әйттеләр.* Һ. Дәүләтшина. *Ямал еңгә.. шуны әйтеп ҡуям: әгәр ҙә Йомағол ағай менән һаман да шулай тауышланып йәшәй торған булһаң, партияға алыуҙы лайыҡ тапмабыҙ.* М. Тажи./ Нимәләр эшләргә ҡушыу, бойороу. *Әйткәнде тыңлау.* ■ *Түрә әйткәс, Ҡарасәс һүҙ көрәштерә алманы.* Ғ. Дәүләтшин. *Туҡһан туғыҙ әйттем шул баланы алып барырға тип яслегә.* С. Кулибай.

**3.** Кем йәки нимә тураһындалыр һүҙ еткереү; ошаҡлау, әләкләү. *Кемгә әйтергә? Тиҙ генә Анна Константиновнаға барҙым да: — Әмирханов,— тинем,— Урманцевҡа өс тюк эре биҙәкле тауар бирә.* С. Агиш. *Ул арала булмай, бая осраған шымсы ҡарт килеп етә. Ул тиҙерәк инеп, хәбәрҙе ҡыҙҙың атаһына әйтергә ҡыҫтынып йөрөй икән, ти* (Әкиәттән).

**4.** Шелтә, асыу белдереү. *Атаһына үткәрә-үткәрә әйтеүенә Фатиманың еңгәләре эстән шатланып торҙолар. Фатима һаман әйтә бирҙе.* Ж. Кейекбаев. *Сеү. Зәйнәбем, ауыр әйттемме ни? Туҡта инде, юҡҡа илама.* Ғ. Сәләм.

**5.** Ниндәйҙер һорауға йәки һүҙгә яуап биреү. *[Зәйнәп:] Ә минең балаһыҙ булыуым, әйтсе, кем эше?* Ғ. Сәләм.

**6.** Нимәләр тураһында һөйләү, белгертеү (ғәҙәттә төҫ-киәфәт, ҡылыҡҡа ҡарата). *Арығанлығын төҫө әйтеп тора.* ■ *[Фирҙәүстең] буйы-һыны, ҡыланышы әйтеп тора: бурҙар менән бергә тыуҙыҡ, бергә үҫтек.* Ш. Бабич.

**7.** Өҫкә ниндәйҙер бурыс, йөкләмә алғанды белдереү. *Күлдәк әйтеү. Нәҙер әйтеү.* ■ *Әйтеү әйттек ҡорбан салырбыҙ тип, ҡайтып килһә берәй балабыҙ.* Б. Вәлит.

**8.** Ҡайҙалыр, нимәгәлер саҡырыу. *Ашҡа әйтеү. Сәйгә әйтеү. Эшкә әйтеү.* ■ *Кистән ҡапҡа ҡағып, ишек шаҡып, йыйылышҡа әйтеп сыҡтылар.* Р. Ғабдрахманов.

**9.** Әйтемләп, көйләп уҡыу, һөйләү. *Бәйет әйтеү. Ҡобайыр әйтеү. Үләң әйтеү.* ■ *Ике ҡатын таҡмаҡ әйтеп, гармунға бейей башланы.* Д. Юлтый. *Үҙеңә йомаҡ әйтәйем, тапһаң улым итәйем, тапмаһаң ҡолом итәйем* (Ҡобайырҙан). / Төрлө доға һ. б. уҡыу. *Аҙан әйтеү. Зекер әйтеү. Тәкбир әйтеү.* ■ *Өйгә кереп, тәһлил әйтеп, доға ҡылдылар.* М. Ғафури. *Юҡ гәйеп, ас бит, бисара, нишләһен, ашыға торғас, әйтмәгән бисмиллаһын.* Ш. Бабич.

**10.** Ниндәйҙер тәм биреү. *Күк тәме әйтә. Һөт әсе тәме әйткән. Һурпаға ялҡын тәме әйткән.* ■ *Шығырым, һин — эрем тәме әйткән, ҡойоп бешкән арыш икмәге.* Р. Ғарипов.

**11.** Ғәҙәттә күплектә килеп, ниндәйҙер хәбәр йөрөгәнен белдергәндә ҡулланыла. *Телгә бөткән шаян тип әйтәләр. Уны бик хәйләкәр тип әйтәләр. Әйтәләр ҙә ул, ләкин улай түгел.*

♦ **Мин һиңә әйтәйем** нимәгәлер ғәжәпләнеберәк торғанды белдерә. *Бер ваҡыт, мин һиңә әйтәйем, пар юртаҡ еккән бер кеше ҡапҡа алдыма килеп туҡтаны* (Әкиәттән). **Ни әйтәйем** нимәнеңдер сифатһыҙ булғанын белдереү өсөн ҡулланыла. *Орлоғона уның ни әйтәйем! Сирек ерем биш бот саҡ бирҙе.* Ғ. Амантай. **Тел әйтеү** *диал. ҡар.* **һүҙ әйтеү. Һүҙ әйтеү** тел тейҙереү, асыуланыу. *[Әбей:] Бахыр, кеше һымаҡ ваҡ-төйәкте күреп тә барманы, һис ваҡытта һүҙ әйтмәҫ ине.* Т. Хәйбуллин. **Әйтерең бармы** һөйләүсенең фекерен ҡеүәтләгәндә ҡулланыла. *«Исмаһам, йәне һау ҡалһын инде», — тип йыуатты уны Мәғфүрә. «Әйтерең бармы, үҙе тере ҡайтһа, ризамын».* Һ. Дәүләтшина. **Әйтер инем** мыҫҡыллап йәки түбәнһетеп һөйләгәндә ҡулланыла. *[Нигмәтулла:] Урядниғын әйтер инем! Бигерәк йүнһеҙ булып сыҡты.* Я. Хамматов. **Әйткәнгә көс** *ҡар.* **көс. Әйтмә [лә] инде** кемдеңдер һүҙенә ҡушылып, уны ҡеүәтләгәндә ҡулланыла.— *Белмәгән көйөнә Заһит меҫкен дә хәбәр һөйләргә ынтыла.— Әйтмә инде, үҙенә күрә түгел.* Я. Хамматов. **Әйтһәң һүҙ, төртһәң күҙ** *ҡар.* **һүҙ** 2.

● *Ҡышҡы көн йәйҙе әйтер.* Мәҡәл. *Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла.* Мәҡәл. *Әйткән һүҙ — атҡан уҡ.* Мәҡәл.

**ӘЙТЕҮ** [2] *и.* Бирелгән һүҙ, ант, вәғәҙә. *Әйтеү (итеп) әйтеү.* ■ *[Тайба — килененә:] Уландарым һуғыштан иҫән-аман ҡайтһа, аҡ ҡорбан салырмын тигән әйтеүем бар ине.* З. Биишева.

**ӘЙТЕҮЛЕ** *с.* Алдан вәғәҙәләшкән, әйттерелгән. *Маян әйтә: «Сыбар ала атымды менәйем, атай, әйтеүле егетемде күрәйем, атай».* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ӘЙТЕШ** *и.* Сәсәндәрҙең халыҡ алдына сығып, шиғри һүҙ, ҡобайыр менән ҡара-ҡаршы әйтешкән ярышы.

**ӘЙТЕШЕҮ** *ҡ.* **1.** Ҡара-ҡаршы нимәлер әйтеү. *Бөгөнгө көнгә тиклем йылы һүҙ әйтешмәнек.* С. Агиш. *Егет менән ҡыҙҙың .. береһе: «Маянһылыу!», икенсеһе: «Ҡуҙыйкүрпәс!» тигән һүҙҙән башҡа бер һүҙ ҙә әйтешә алмай торҙолар, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». / *күсм.* Талашыу, ырлашыу. *[Ныязғол:] Йә, ярар инде, ағай-энеләр, туй үпкәһеҙ булмаҫ, тигән шикелле, үпкәләштек тә, әйтештек тә инде.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Шиғри һүҙ, ҡобайыр менән әйтештә ҡатнашыу. *Алмашәкәр инәйҙең бабайы ла, Ғәйрәт олатай ҙа мәкәл сығара, үләң әйтешәләр.* С. Кулибай. *Көндәр үҙған. Таңатар һунарға йөрөгән, ҡурай тартҡан, ҡыҙ күҙләгән, ҡош сөйгән, көрәштәрҙә ҡатнашҡан, ҡобайыр әйтешкән.* Ә. Вахитов.

**ӘЙТКӘНДӘЙ** *инш.* **1.** Нимәнелер һорарға йәки әйтергә онотоп тороп, ҡапыл иҫкә төшкәндә әйтелә. *[Рәхимйән:] Әйткәндәй, ул ханым ҡайҙа китеп юғалды һуң әле.* Н. Иҙелбай.

**2.** *ҡар.* **әйтмешләй.** *Тимергәле олатай әйткәндәй, эшләп түләрмен.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘЙТКӘНСӘ** *р.* **1.** Өйрәткәнсә, ҡушҡанса. *Үҙе әйткәнсә.* ■ *Ҡуҙыйкүрпәс тә әсәһенә, күк толпар әйткәнсә, һамаҡлап яуап бирҙе, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** *инш. мәғ. ҡар.* **әйтмешләй.** *Ҡәүи мәгзүм Өфөләге байҙар .. мәнфәғәтен алға һөрөүсе, үҙе әйткәнсә, «Мосолмандар иттифаҡы» ойошмаһынан килеп төшкән бер бәндә.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘЙТМЕШЛӘЙ** *инш.* Кемдеңдер һүҙенә таянғанда, һүҙҙең, фекерҙең сығанағын белдергәндә әйтелә. *[Әлхәм:] Ҡайным мәрхүм әйтмешләй, сәфәр сығыу сәй эсеү түгел икән ул.* С. Кулибай.

**ӘЙТМӘКСЕ** *инш. диал.* Әйтмешләй, әйткәндей.

**ӘЙТТЕРЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **әйттереү** [1] 2. *Әйттерелгән кәләш.*

**ӘЙТТЕРЕҮ** [1] *ҡ.* **1.** *йөкм. ҡар.* **әйтеү** 1—4, 7, 9. *Кешенән әйттереү. Һүҙ әйттереү. Таҡмаҡ әйттереп бейеү.*

**2.** Ҡыҙҙы алыу-биреү тураһында һөйләшеү, һөйләшеп килешеү. *Килен әйттереү.* ■ *Әсәйемдең бөтә хыялы Ғәлим ағайға кәләш әйттереп, ҡоҙа-ҡоҙағый булышып, дошман һүҙен аяҡ аҫтына ҡалдырып, килен рәхәтен күреү ине.* Д. Юлтый. *Теге ҡыҙҙың батырлығы тирә-яҡҡа тарала. Уны үҙе ҡеүек бер батыр егет әйттерә. Бик шәп итеп туй үткәрәләр* (Әкиәттән).

**3.** Кемгәлер бирергә алдан вәғәҙә итеү. *[Мәликә — Аллаярға:] Нахаҡҡа рәнйетәһең! Алайғырҙағы энемдең быҙауы бит ул. Беҙгә әйттергәйне. Үҫтереп бирермен, исмаһам, малға тейенеп китерһегеҙ, тигәйне.* Ф. Иҫәнғолов.

**4.** *күсм.* Ғүмерҙе күңелле үткәреү, кәйеф-сафа ҡороу; уйнап-көлөп күңел асыу. *[Йыһан:] Әйттереп ҡалығыҙ, йәштәр, йәш саҡта.* Ш. Шәһәр.

**ӘЙТТЕРЕҮ** [2] *и.* Әйттергән, вәғәҙәләшкән ҡыҙ. *Ҡуҙыйкүрпәс әсәһенең ике ҡулын ҡыҫып: «Ми-*

*нең әйттереүем бармы? Әйт!» — тип һораны, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ӘЙТТЕРЕШЕҮ** *к. һөйл. урт. ҡар.* **әйттереү** [1] 4. *Тальян тартып тыҡрыҡ буйында, әйттерешеп йөрөнөк уйында.* Ғ. Амантай.

**ӘЙТӘГҮР** *ымл.* **1.** Ниндәйҙер хәлгә аптырап ҡалғанда, бошонғанда әйтелә. *[Ҡатын:] Бер самауыр ҡуяйым тиһәң, ыҙаланып бөтәһең, әйтәгүр.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Нимәнелер хуплағанда әйтелә. *[Ҡотлояр — Хәлимәгә:] Шулай кәрәк, килен. Ҡаҙанҡаптың һылыуының кәрәген бирҙеңме, әйтәгүр!* Һ. Дәүләтшина.

**ӘЙТӘЙЕК** *инш.* Миҫал, фараз рәүешендә бер нәмә әйткәндә ҡулланыла. *[Өйрәнсек — Һөнәрсегә:] Бар. Ундай мөмкинлек бар, ҡорҙаш. .. Әйтәйек, быйыл был мөғжизәле көршәктәрҙе һин эшләй беләһең. Ә эшеңдең емешен ашай белмәйһең.* З. Биишева. *[Көтөүсе:] Зөлхиҙә апай, әгәр ҙә быйыл бөгөн, әйтәйек, .. Зөлкәрнәй ағайым килеп төшһә, һин уға барыр инеңме?* Н. Иҙелбай.

**ӘЙТӘМ** *инш.* Эштең нимәлә икәнен аңлап ҡалғанда, сәбәбен ҡапыл аҫҡанда әйтелә. *[Ғариф:] Әйтәм, бөгөн танау ҡысытып тора ине, күстәнәстән ауыҙ итергә булған икән.* Б. Бикбай.

**ӘКБӘР** *[ғәр.] с.* **1.** *иҫк. кит.* Иң ҙур, өлкән.

**2.** *дини* Бөйөк алланың эпитеты, алланы ололау һүҙе. *Бер нисә кеше гөрләтеп тәкбир әйтә башланы. .. Әкбәрҙәре өсәр аршын һуҙылып сыҡҡан был тәкбир гәйәт һайын ғына ишетелгәнгә, Нәғимгә бик таныш ине.* Й. Солтанов.

**ӘКЕМ** *и. диал. ҡар.* **әүрәү** [2].

**ӘКЕРТЕН** *р. диал.* Әкрен. *Әкертен ел йәйге урманда.* Р. Ниғмәти.

**ӘКИӘТ** *и.* **1.** Халыҡ ижадында тылсымлы көстәр, сихырсылар ҡатнашлығында барған төрлө уйҙырма ваҡиғаларға ҡоролған сәсмә әҫәр. *Тулыбай .. мең ҡабат сәйнәлгән ҡуркыныслы «Йәшел әүлиә» әкиәтен һөйләргә тотондо.* Ғ. Дәүләтшин./ Шундай уҡ йөкмәтке һәм формалағы ғәҙәти булмаған хәл йәки әҙәби әҫәр. *[Ғүмәр — Санияға:] Мин һеҙгә Гулливер әкиәттәрен һөйләрмен, йә булмаһа, Жюль Верн хикәйәләрен.* С. Агиш.

**2.** *кусм.* Юҡ-бар һүҙ, уйҙырма. *[Шәрәф:] Ҡуй әле, атай .. һинең ул Варшава ҡалаһы, герман һуғышы тураһындағы әкиәттәрең бөтмәҫ, эшеңә бар.* Б. Бикбай. **Әкиәт һатыу** юҡ-бар һүҙ һөйләү. *Ҡапҡа төбөн һырып алған йыйын эшлекһеҙ алғы эш хаҡында әкиәт һата.* Т. Йәнәби.

**3.** Ниндәйҙер эш-хәлгә кире мөнәсәбәтте белдергәндә әйтелә. *Быйыл комағайҙар. Ныязгол һымаҡ, байлыҡтан туймайҙар икән, әкиәт.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘКИӘТСЕ** *и.* Әкиәт һөйләүсе. *Танылған әкиәтсе. // Әкиәтсе әбей.*

**ӘКРЕН** *р.* **1.** Бәләкәй генә тиҙлектә, яй; аҡрын. *Әкрен әйләнеү.* ■ *Быйыл уҙан буйына әкрен генә күк томан һарыла.* З. Биишева. *Китеүселәр, оҙатыусылар әкрен генә барған арбалар артынан йәйәү атлай.* Һ. Дәүләтшина. / Һалмаҡ ҡына, ашыҡмай; яй ғына ҡуҙғалып. *Әкрен атлау. Әкрен йөрөү. // Әкрен кеше.*

■ *[Ике сәғәттән һуң] инде Аҡназарҙың күҙҙәре һөҙөлгән, теле көрмәлгән, ғәҙәттәге хәле киткән — ул әкрен генә ҡалғый ине.* Ғ. Дәүләтшин. *Әкрен барам. Тәрән уйҙарға сумып барам.* Д. Юлтый.

**2.** Талғын ғына иҫкән; еңелсә (ел тураһында). *Төньяҡтан әкрен, ләкин ҡырҡыу ел иҫә.* Б. Бикбай. *Әкрен, әкрен генә таң елдәре таң һалҡынын һирпеп үтәләр.* Т. Йәнәби.

**3.** Ишетелер-ишетелмәҫ итеп; тын ғына. *Әкрен генә өндәшеү. Әкрен һөйләшеү.* ■ *Гөлйөҙөм башта «Урал» көйөн әкрен генә, һүҙһеҙ генә моңрәтеп көйләне.* Һ. Дәүләтшина. *Күрәм, уҙ олпатын боҙмай һаҡлап, Урал ята әкрен, тын ғына.* Ш. Бабич.

**4.** Һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә, һаҡ, иҫләп (күберәк генә киҫәксәһе менән ҡулланыла). *Диңгеҙ .. ҡалҡыуысты әкрен генә ҡаҡҡылап-һуҡҡылап ҡарай.* З. Биишева. *Заятүләк .. Һыуһылыуҙы әкрен генә кәбергә күтәреп һала, [шунан] һеңгөһө менән үҙен-үҙе сәнсә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**5.** Оҙаҡҡа һуҙылып, бик яй. *Был минутты беҙ бик оҙаҡ көттөк, әллә ваҡыт әкрен йөрөгәнгә.* М. Хәй.

**6.** *ымл. мәғ.* Ниндәйҙер эште тыйғанда, һаҡ булырға өндәгәндә әйтелә.— *Әкрен, йыртаһың! — тине Булат, ҡағыҙҙы юрамал ныҡ тартып, үҙе йыртып сығарҙы.* Б. Бикбай.

**ӘКРЕНЛЕК** *и.* Әкрен (1 мәғ.) булыу сифаты. *Эштәге әкренлек харап итә.*

**ӘКРЕНЛӘП** *р.* **1.** Әкрен генә ҡуҙғалып; ашыҡмай, яй ғына. *Әкренләп һыу буйлап шыуабыҙ.* Д. Юлтый./ Ваҡыт үтеү менән, күпмелер ваҡыттан һуң. *Кисә булған һөйләшеүҙәр әкренләп [Булаттың] иҫенә төштө.* Б. Бикбай. *[Һалдат] әкренләп .. байлығын туҙҙырып бөтөрә* (Әкиәттән).

**2.** Һиҙҙермәй, иҫләп кенә. *Иген яланы йәйелеп ята. Был — Ныязғолдоң ауыл кешеләренән әкренләп, оҫталап, .. үҙенә күсереп бөткән ерҙәре.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *кусм.* Бер сама менән, һәүетемсә. *[Райком секретары:] Ултырығыҙ, иптәш Янһаров!.. Ну, һаулығығыҙ нисек? Эштәр бармы? [Тимер:] Әкренләп.* Б. Бикбай.

**ӘКРЕНЛӘТЕҮ** *к.* Әкрен генә йөрөтөү, яй ғына атлатыу. *Беҙ Ҡылысбайҙы ниндәй сәләм менән килер тип көтә-көтә, малдарҙы әкренләтеп кенә Йәндек йылғаһын сығып та киттек.* Ш. Шәһәр.

**ӘКРЕНЛӘҮ** *к.* Әкрен генә йөрөү, әкрен хәрәкәт итеү. *Бара торғас, әкренләнеләр.*

**ӘКРЕНӘЙЕҮ** *к.* **1.** Әкренгә (1 мәғ.) әйләнеү, әкрен булыу. *Уның [Хәмиттең] аяҡтары тышалды, аҙымы әйрәнәйҙе, башы түбән эйелде.* Б. Бикбай.

**2.** Тауыш кимәле кәмеү. *Ары киткән һайын йыр тауышы әкренәйҙе. Бара-бара бөтөнләй һүнде.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘКРЕНӘЙТЕҮ** *к.* **1.** Әкренгә (1 мәғ.) әйләндереү, әкрен итеү. *Аҙымды әкренәйтеү.* ■ *Бәйге урынынан бер-ике саҡырым китеп, кеше күҙенән юғалғас ҡына йөрөштө әкренәйттем.* Д. Юлтый.

**2.** Тауыш кимәлен кәметеү. *Радионы әкренәйтеү.* ■ *Вася күҙҙәрен тағы ла нурлы күлдөрөп дуҫына ҡарай ҙа, тауышын әкренәйтеп, серен сисә.* Ғ. Дәүләтшина.

**ӘКРЕС** *р. диал.* Әкрен.

**ӘКСӘР** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Бик күп. *Ғаҡыллылар хур булдылар, тоткон булып. Ер йөҙөндә тороп ҡалған әксәр ахмаҡ.* М. Ғафури.

**ӘКСӘРИӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Күпселек. *Мине .. бында ултырған мөғтәбәр йәмәғәтселектең әксәриәте белә.* С. Агиш.

**ӘКӘ** *и. диал.* **1.** Атай. *Һин беләһең үҙ әкәң менән сисәңде бик анык.* Я. Юмаев.

**2.** Ағай.

**ӘКӘЙ** *и. диал.* **1.** Мәжүси.

**2.** Мари ҡатын-ҡыҙы.

**ӘКӘЛӘ(К)** *и.* Имән сәтләүегә. *Әкәлә йыйыу.* ■ *Имән әкәләһе өҙөлөп китеп, сысҡандың яурынына төшә* (Әкиәттән).

**ӘКӘМ-ТӨКӘМ** **1.** *и. зоол.* Йомшаҡ тәнле умыртҡаһыҙ йән эйәһе.

**2.** *с. кусм.* Баһаһы түбән, әһәмиәте бәләкәй (кешегә ҡарата). *Ул тормошта әкәм-төкәм булып йәшәргә теләмәне.* Ә. Чаныш.

**ӘКӘМӘТ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Ғәжәп итерлек хикмәтле эш-хәл йәки күренеш. *Ҡыҙыҡ әкәмәткә осрау.* ■ *Етәкләшеп, түңәрәк булып теҙелә башланылар. Мин, был ниндәй әкәмәт икән, тип аптырап ҡарап торам.* Т. Йәнәби. *[Хисмәтулла:] Нимә булған һуң? [Старатель:] Әкәмәт инде шунда. Аңламаҫһың.* Я. Хамматов./ Мауыҡтырғыс, ҡыҙыҡлы нәмә, эш-хәл. *Берәй әкәмәт уйлап сығарыу. Төрлө әкәмәттәр һөйләп көлдөрөү.*

**2.** *с. мәғ.* Ғәжәп итерлек, хикмәтле. *Әкәмәт хәл.* ■ *Редакцияға Туғановтың әкәмәт эштәре тураһында хаттар яуа башланы.* Ә. Вәли. *Беҙ бәләкәй саҡтарҙа «ҡыҙ әүрәтә» торған әллә ниндәй әкәмәт доғалыҡтар була торғайны.* Т. Йәнәби. / Ҡыҙыҡ, мәҙәк. *Әкәмәт кеше.*

**3.** Әҙәмде аптыратҡан ҡыҙыҡ кешегә ҡарата әйтелә. *[Старшина — Туктамышовка:] Төптө юкты һөйләйһең, әкәмәт. Мин халыкты таламайым.* Б. Бикбай./ Нимәнелер ныҡ ғәжәп күргәндә әйтелә. *Бына ҡыҙыҡ ҡайҙа ул, әкәмәт!* Я. Вәлиев. **Бына әкәмәт** нимәгәлер ныҡ ғәжәпләнгәндә әйтелә. *Бына әкәмәт, минең менән, һеҙ ҙе ғәфу итегеҙ, тип кенә һөйләшәләр.* С. Агиш.

**4.** *киҫ. мәғ.* Ифрат, бик. *Әкәмәт матур.* ■ *[Әпхаликтарҙың] йорто бик матур, ҡапҡалары әкәмәт ҙур, иҫ киткес ныҡ ине.* С. Агиш.

♦ **Дыу әкәмәт килеү** ныҡ шаулашыу, зыҡ ҡубыу. *Дыу әкәмәт килеп уйнай балалар.*

**ӘКӘМӘТЛӘНЕҮ** *к.* Ниндәйҙер эш менән мәшғүл булыу; маташыу, булышыу. *Бакса эше менән әкәмәтләнеү.*

**ӘКБӘХ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Иң эшәке, ҡәбәхәт. *Ғүмеремә күңелемде тырнап торған әкбәх иблисем.* Ш. Бабич.

**ӘКДӘС** [*ғәр.*] *кит.* **1.** *с.* Изге. *Ярлың — вилдан, әкдәс хыялдар ағылалар шунан.* Д. Юлтый.

**2.** *р.* Бөтә күңелдән, ихлас. *Шулай уны саниғ күп гөлдәрҙән арыҡ итеп әкдәс яратҡан, яҡты күҙкәйҙәрен, уйһыҙ күңелен, сәмаларҙан өҫтөн ҡаратҡан.* Б. Мирзанов.

**ӘКЛИМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Өлкә. *Ул [хан] әклим башлыҡтарын тиҙ генә килеп етергә саҡырған.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ӘКРӘБӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк.* Туған тейеш кеше.

**ӘКСА** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Йыраҡ, алыҫ булған. *Ҡодес тәхетемде күрәйем тип ашты рухым әксаға.* Х. Ғәбитов.

**ӘКҮӘ** [*ғәр.*] *с. кар.* **ҡеүәтле.** *Уның мәнегтәре һәм әглә вә әкүә була.* «Батыршаның хаты».

**ӘЛ** *и. иҫк. кит.* Ҡул. *Шул уҡ [Казан шәһәрендәге] дәфтәргә яҙылған указнамә һануз да әлебеҙҙә бар.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ӘЛБЕРӘҮ** *к. диал.* Әлһерәү. *[Ҡарт:] Күбәләктәй йәнем бар, бер йотомдай ҡаным бар, әлберәгән тәнем бар.* «Урал батыр».

**ӘЛБИҘӘ** *и. диал.* Алабута.

**ӘЛБИТТӘ** [*ғәр.*] **1.** *мөн.* Фекерҙең ысынбарлыҡҡа тура килеүен, дөрөҫлөгөн, уға баһа биреүҙе белдерә; һис шикһеҙ. *Әлбиттә, минең өсөн был ауыр эш.* З. Биишева. *Иң шат йәшәүселәр — беҙҙекеләр, иң бай булған, әлбиттә, беҙҙең ер.* Х. Ҡунаҡбай.

**2.** *инш.* Эш-хәлдең тәбиғи, ғәҙәти булғанын белдереү өсөн ҡулланыла; билдәле. *Мурзин, әлбиттә, бер нәмә лә абайламаны.* Һ. Дәүләтшина. *Әлбиттә, мин дәфтәргә ҡағылманым.* Д. Юлтый. *Сыртлановҡа [минең] .. нимә һөйләүем ҡыҙыҡ ине, әлбиттә.* С. Агиш.

**ӘЛБЫУЫН** *с. диал.* Хәлһеҙ, тәнтерәк. *Әлбыуын кеше.*

**ӘЛБӘ** *и.* Ҡуйы һөткә, һөт өҫтөнә бешерелгән манный бутҡаһы. *Әлбә бешереү.*

● *Кешегә барып әлбә ашауҙан, үҙ өйөңдә һалма ашау артыҡ.* Мәҡәл. *Эткә әлбә һый түгел.* Мәҡәл.

**ӘЛБӘТТӘ** [*ғәр.*] *кар.* **әлбиттә** 1.

**ӘЛГӘНЙӘК** *и.* Тейендәр ғаиләһенә ингән һоро төҫтәге, арҡа буйында биш ҡара һыҙаты булған ваҡ кимереүсе йәнлек. *[Таңдыса:] Береһе урҙә, береһе ерҙә уйнай, әлгәнйәге менән ялманы.* «Ҡуңыр буға».

**ӘЛҒАЯЗЫ** [*ғәр.*]: **әлғаязы билләһи** *инш. иҫк. кит.* Хоҙай, аллам һаҡлаһын тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Мулла:] Барыбыҙ ҙа тамуҡлы булаҡбыҙ, әлғаязы билләһи.* Һ. Дәүләтшина. *[Самат:] Әлғаязы билләһи! Тәүбә! Һинең менән һөйләшһәң, иманһыҙ үлерһең.* Х. Ибраһимов.

**ӘЛДЕРКИ** *ымл. һөйл.* Ҡапыл ғәжәпләнгәндә, һоҡланғанда әйтелә. *Кулдәге шәп тә һуң, әлдерки!*

**ӘЛДИЛӘҮ** *к. диал.* Әпәүләү. *Әсәһе, бахыр, әлдиләп кенә үҫтергән яңғыҙ улының ошолай ир-егет булып йөрөгәнен күрә алмай, үлеп китте.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘЛДӘ** *мөн.* Нимәнелер урынлы, ваҡытлы тип тапҡанда, ҡәнәғәт, риза булғанды белдергәндә ҡулланыла; ярай әле, яҡшы. *Әлдә ингәнмен, тип әлегә миклем шатланып бөтә алмайым.* Ә. Вахитов. *Әлдә һин бар, юкһа донъям мәғәнәһеҙ һәм файҙаһыҙ.* Ш. Бабич.

**ӘЛДӘН-ӘЛЕ** *р. кар.* **әленән-әле.**

**ӘЛЕ**[1] *р.* **1.** Һүҙ барған мәлде, ошо ваҡытты белдерә; хәҙер. *Варшаванан сыҡҡанда минең уң аяғым бик ныҡ ауырта ине, әле бер аҙ ҡыҙып китте бугай, ауыртмай башланы.* Д. Юлтый.

*[Колкай:] Зөлхизә апай, күңелеңә ауыр алма, мин һиңә уның [Зөлкәрнәйҙең] кайҙа икәнен әле генә әйтә алмайым.* Н. Иҙелбай. / Билдәле бер ваҡытта, ошо мәлдә. *Фәгилә әле йәш, төҫкә бик һылыу.* Б. Бикбай.

**2.** Ошо мәлдән алда ғына, яңы ғына. *Әле һөйләшкәндәрҙе иҫкә алһаң, кыҙык бит.* С. Агиш. *Бына әле генә сәхрәләрҙә йәш колонбай сабып уйнаным.* Ш. Бабич. **Әле генә** (*йәки* **яңы**) күптән түгел, яңы ғына.

**3.** Ошоға тиклем, ошо көнгәсә; хәҙергәсә. *Ул [крәҫтиән] әле грамотаны ла насар белә.* С. Агиш. *Әле беҙҙең тормош .. сыға алмаган һаҙҙан, сокорҙан. Әле беҙҙең юлдар эрселмәгән япраҡ ярмай торган сытырҙан.* Ғ. Хәйри. **Әле** лә (*йәки* **булһа, һаман**) ошоға тиклем, ошо көнгәсә, һаман. *Ҡайын туҙынан яһалган тырыз менән еләккә йөрөгәнәмде әле булһа һагынам.* В. Нафиҡов. *Уга әле һаман диәтала гына йәшәргә кушалар.* С. Агиш.

**ӘЛЕ** [2] *терк.* Теҙмә ҡушма һөйләм йәки тиң киҫәктәр алдынан килеп, ундағы бер-бер артлы килгән ваҡиға-күренештәрҙе һанап сыҡҡанда ҡулланыла. *Хаят .. әле атаһы, әле әсәһе янына барып һырлыга.* Һ. Дәүләтшина. *Сәмрегош үҙе оса, үҙе һаман башын әле уңга бора, әле булга бора икән* (Әкиәттән).

**ӘЛЕ** [3] *киҫ.* **1.** Бойороҡ, теләк ҡылымдары йәки өндәү һүҙҙәре менән бергә килеп, уларҙың мәғәнәләренә үтенес, кәңәш биреү, теләк төҫмөрө өҫтәй. *Әйҙә әле. Бир әле. Күрәйем әле. Ҡуй әле. Ултырайыҡ әле.* ■ *[Хафиз:] Ҡана, кил әле, нисә ботка арттың икән?* М. Тажи. *[Янһары:] Мин һеҙҙең кейәүегеҙ булам инде. [Дейеү:] Ярар, акшы булган. Тик әйт әле, кейәү — тормошта нимә әсе, нимә йомшаҡ, нимә каты?* (Әкиәттән). / Ҡәтғилек, талап төҫмөрө өҫтәй. *[Ғариф:] Ниңә кабат кайткан ул [Гәрәй]? Бына шуны әйтһен әле ул беҙгә.* Б. Бикбай.

**2.** Хәҙерге һәм киләсәк заман хәбәр ҡылымдары менән бергә килеп, эштең әлегә тамамланмауын, дауам итеүен йәки киләсәктә үтәлерен белдерә. *Йөрөйөм әле. Йоҡлайым әле. Тауҙа кар иремәгән, ята әле. Тагы бер-ике йыл эшләйем әле.* ■ *Мин былай гел кешегә эшләп йөрөмәм әле.* Т. Йәнәби./ Киләсәк заман хәбәр ҡылым менән килеп, нимәгәлер артыҡ бошонмағанды, иҫ китмәгәнде белдерә. *[Үмәр — Мүйылбикәгә:] Етер, тим. Уллы ла илар, улһыҙ ҙа илар, тигәндәр. Астан үлмәбеҙ әле.* Һ. Дәүләтшина. *[Зөләйха:] Мин ярлы кыҙы шул, һин мине һанга һукманың, .. курергә гәрләндең. Мин дә ирһеҙ калмам әле.* Т. Йәнәби.

**3.** Үткән заман хәбәр ҡылым һәм **һуң** киҫәксәһе менән килеп, нимәгәлер аптырағанды, борсолғанды белдерә. *[Сәгиҙә:] Тукта, ул [карт] ниңә улай тине һуң әле? Бер әмәлен уйлап карармын әле, ти. Нимә эшләргә итә икән?* М. Тажи. *Тукта, был ниндәй тауыш булды һуң әле? Ишеткәнем юк бит был тауышты.* С. Агиш.

**4.** Ваҡыт төшөнсәле рәүеш менән килеп, шул һүҙҙең мәғәнәһен көсәйтә, һүҙ баҫым менән әйтелә. *Бөгөн әле бригадир Якуп кыҙыл обоз ойоштороу тураһында һөйләп торҙо.* Б. Бикбай. *Әле бына өсөнсө көн генә укып кайткан Ғөльямалды күрҙем.* Т. Йәнәби.

**5.** Ниндәйҙер бер билдәгә, фактҡа баҫым яһап, фекерҙең тәьҫир көсөн арттыра. *Вәт, кандай оҫталар булган борон заманда ла! Эй.. аптырар сагың алда әле.* З. Биишева. *Ярай, мин китәйем әле, атыу һуңга калам.* Д. Юлтый.

**6.** «Бит» киҫәксәһе менән бергә эш-хәлдең булыуын билдәләп һәм раҫлап, уға икеләнеберәк, аптырап торғанды белдерә. *Китәм ти бит әле. Эштең осона сыгырлыҡ түгел бит әле. Ямғыр яуа ла яуа бит әле.* ■ *Никах, туй сыгымдарына аҙ китмәҫ бит әле.* Һ. Дәүләтшина. *Кеше ишеге төбөнә алъюһыкка бер үҙем барып ултырырга кыймайым бит әле.* Т. Йәнәби./ Аптырау ҡатыш һоҡланғанды белдерә. *Малай көтәләр, малай [Ғамир менән Шәрифә]! Хатта исемен дә билдәләп ҡуйҙылар инде — Дамир. Ниндәй матур исем, үҙе Ғамир менән һүҙмә-һүҙ тип әйтерлек, йәтеш кенә тап килеп тора бит әле.* Б. Бикбай.

**7. Бар, юҡ, түгел** модаль һүҙҙәре йәки рәүештәре менән килеп, ваҡыт яғынан сикләү йәки, киреһенсә, дауамлылыҡ төҫмөрөн бирә. *Вакыт бар әле. Эш күп әле. Иртәрәк әле.* ■ *Ә миңә эш табылыр төҫлө түгел әле.* С. Агиш. *[Ғариф — Тимергә:] Һинең туй һыйынды һаман күргән юк әле.* Б. Бикбай. *Совет мәктәбендә белем, тәрбиә алган йәш укыгысыларга мохтажлыҡ ҙур әле.* М. Тажи.

**ӘЛЕГЕ** *с. һөйл.* **1.** Ошо мәлдә булған, ошо ваҡытта барған; хәҙерге. *Элеге көндә. Әлеге вакытта.* ■ *Әлеге кейем туҙһа, башкаса боҙоп [тегер нәмә юк].* Һ. Дәүләтшина. *[Таҙ — Кәмән менән Сәмәнгә:] Икегеҙ ҙә бына әлеге һымак, иҫегеҙ китеп, хәлһеҙләнеп яттыгыҙ* (Әкиәттән).

**2.** Телгә алынған, быға баса билдәле булған; шул уҡ, шул бер; баяғы. *Әлеге бер аш. Әлеге бер яңгыҙлыҡ.* ■ *Урак өстө еттеме, әлеге ямгыр яфалай башлай.* Р. Низамов. *Алһыу .. үҙе бара, үҙе уйлана, әлеге картка асыуы кабаргандан кабара.* Ғ. Ибраһимов.

**ӘЛЕГЕ-БАЯҒЫ, әлеге лә баяғы** *с.* Быға баса, электән үк билдәле булған. *Әлеге-баягы Ғәтиәтулла олатайҙың тагы бер йыры иҫкә килеп төштө.* З. Биишева. *[Гөлйөҙөм:] Ниҙәр уйланың һуң әле? [Айбулат:] Ни тип, шул, әлеге лә баягы инде. Үҙебеҙгә башка айырылып сыгырга кәрәк ине.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘЛЕГЕСӘ** *р.* Ғәҙәттәгесә, элеккесә. *Егет .. бара-бара, бер калага барып етә. Арыгас, әлегесә бер әбейгә инә [Әкиәттән].*

**ӘЛЕГӘ** *р.* **1.** Хәҙерге ваҡытта, әле. *Мин әлегә тик кояшка гашик, уны һөйәм, унан һөйөләм.* Г. Юнысова. *Ҡатын менән тик сәгәттең якшыларын әлегә тапкан юк.* Ғ. Сәләм. **Әлегә тиклем** (*йәки* **саҡлы**) ошо көнгәсә, хәҙергәсә; әлегәсә.

**2.** Ваҡытлыса, хәҙергә. *Ярар әлегә. Әлегә китмәй тор.* ■ *[Йәмлиха:] Дефицит материалдарҙы әлегә килтермәй торам..* Ғ. Әхмәтшин.

**ӘЛЕГӘСӘ** *р.* Ошо көнгәсә, һуңғы көндәргә тиклем; быға баса. *Бына әлегәсә төпсөк улдары Кинйәбулат менән өсәүләп кенә донъя көтөп яткан булалар.* Р. Солтангәрәев. *Балалар бак-*

*саһы тураһында һүҙ бара бит. Ниңә әлегәсә Тимерҙең башына килмәгән әле был?* Б. Бикбай.

**ӘЛЕНӘН-ӘЛЕ** *р.* Ваҡыты-ваҡыты менән, ваҡыт-ваҡыт; әлдән-әле. *Баяр утарында әләнән-әле бер хәл сыға торған.* М. Тажи. *Әленән-әле ҡолондар кешенләп ҡуя.* М. Сәғитов.

**ӘЛЕП** [1] *и. һөйл. ҡар.* **элиф** [2].

♦ **Әлепте таяҡтан айырыу** хәреф таныу. *[Ҡыҙрас:] Аҡтар менән алышҡанда әлепте таяҡтан айырырға өйрәнеп ҡайтҡайным.* Я. Вәлиев. **Әлепте таяҡ тип [тә] белмәү** хәреф танымау; грамотаһыҙ булыу. *[Бүре:] Бейәнең паспорты ниңә кәрәк булды миңә? Уҡый белһәм, бер хәл ине: әлепте таяҡ тип белмәгән көйө уның паспортын тикшереп торам* (Әкиәттән). **Әлеп тороу** үрә баҫыу.

**ӘЛЕП** [2] *и. диал.* Әҙеп.

**ӘЛЕПБЕЙ** [*гәр.*] *и. һөйл.* Әлифба. *Тимеркәй әлепбейен бер аҙ уҡыны ла шул уҡығанын күсереп яҙа башланы.* Ҡ. Даян.

**ӘЛЕҮ** *ымл. ҡар.* **әләү.**

**ӘЛИМ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Яфа, михнәт. *Күп быуат үтте: әлим, мәжиғ уларҙың [әҙәм балаларының] хәлдәре!* Х. Ғәбитов.

**ӘЛИФ** [1] [*рус.* олифа ⟨ *гр.*] *и.* Ҡайнатып, махсус юл менән эшкәртелгән киндер, етен йәки башҡа үҫемлек майы (буяу, лак яһағанда һ. б. ҡулланыла). *Әлиф һөртөү. Әлиф ҡушыу.*

**ӘЛИФ** [2] [*гәр.*] *и.* Ғәрәп алфавитындағы тәүге хәрефтең атамаһы.

**ӘЛИФБА** [*гәр.*] *и.* Тәүге белем биреү, уҡырға, яҙырға өйрәтеү китабы. *Әлифба өйрәнеү.* ■ *Ғаббас .. ҡайтышлай фабкомдан кереп әлифба китабы алып сыҡты. Шуның менән буш ваҡыттарында Фатиманы уҡырға-яҙырға өйрәтте.* Ш. Шәһәр.

**ӘЛИФЛӘҮ** *ҡ.* Әлиф [1] ҡушып йәки әлиф һөртөп, әлифле итеү. *Иҙәнде әлифләү. Әлифләп сығыу.*

**ӘЛЙЕРӘҮ** *ҡ.* **1.** Хәлһеҙләнеп, ҡарыуһыҙланып; ҡаҡшап ҡалыу; бәлйерәү. *Әлйерәп төшөү.*

**2.** *күсм.* Булдыҡһыҙланыу, ебеү. *Әлйерәп бөткән инде ул.*

**ӘЛЙЕҮӘН** *с. диал.* Былҡым.

**ӘЛ-ЙӨЛ:** **әл-йөл итеү** көс-хәл менән әмәлен, сараһын күреү. *Имен ҡалған өйҙәрҙә ике-өс семья өйҙәш булып, әл-йөл итеп, яңынан донъя көтә башлағандар.* Ж. Кейекбаев.

**ӘЛЛИ:** **әлли булыу** *бал.* йоҡоға китеү; йоҡлау.

**ӘЛЛИ-БӘЛЛИ** *ымл.* Бала йоҡлатҡанда йырлап әйтелә торған һүҙ. *Йоҡлатам һине тирбәтеп, әлли-бәлли көйөнә.* К. Кинйәбулатова. *Йоҡла, бәгерем, йом күҙең, әлли-бәлли, бәллибәү* (Сәңгелдәк йыры).

**ӘЛЛӘ** [1] *киҫ.* **1.** Бирелгән һорауҙы икеләнгән кеүек итеп, ҡәтғилеген йомшартыу өсөн ҡулланыла. *Мин оҙаҡлап киттем, әллә миңә асыуландығыҙмы?* Д. Юлтый. *Ә һуң мин больницаламы әллә?* С. Агиш./ Риторик һораулы һөйләмдәрҙә һорау төшөнсәһен көсәйтә. *Әллә был ҡыҙ мине яратмай инде?* Т. Йәнәби. *Әллә һиҙмәйме икән [командир] беләгенә йәше тамғанды?* Р. Ниғмәти.

**2.** Ни уйларға белмәй, икеләнгәнде аңлата. *Әллә таныманы Бәгиҙә [Ғәмбәровты], әллә икенсе кеше тип уйланы, һирпелеп кенә ҡараны ла, аҙымын йәһәтләп, һарайға инде лә китте.* Ш. Янбаев. *Мин хаҡлымы, әллә тормошмо, күҙ йәш аға ҡарап көлөүҙә.* Ғ. Хәйри.

**3.** Һорау алмашы менән килеп, билдәһеҙлек алмашы яһай. *Әллә кем. Әллә ҡайҙа. Әллә ҡайһы.* ■ *[Зыя:] Тәнзилә инәй, һин әллә нимә һөйләй башланың, ул һүҙҙе кемдән ишеттең?* М. Тажи. *Бара-бара әллә ниндәй һыуҙар кисеп, әллә ниндәй урмандар үтеп, .. Таҙ бер ҡалаға килеп сыҡты, ти* (Әкиәттән).

**4.** Эш-хәл тураһында тойғо менән әйткәндә ҡулланыла. *Әйтмәй әллә, колхоз һауын һыйыр түгел бит.* М. Тажи. *Әллә русса белмәй тиғәс тә.* С. Агиш.

♦ **Әллә кем булыу** *ҡар.* **кем** [1]. **Әллә күпме** бик күп. *Ай китә был, йыл китә, әллә күпме ер китә* (Әкиәттән). **Әллә ҡайҙан** *ҡар.* **ҡайҙан. Әллә ҡасан** *ҡар.* **ҡасан. Әллә ни** 1) бик үк, ул хәтле үк. *Әллә ни түгел. Әллә ни алыҫ түгел;* 2) ни сәбәптәндер, ниңәлер. *[Айбулат:] Ҡарт быйыл әллә ни биреште шул.* Һ. Дәүләтшина. **Әллә ни арала** көтмәгәндә, бик тиҙ ваҡыт эсендә. *[Байгужа] әллә ни арала әллә ҡайҙарҙа булып .. килә.* Д. Юлтый. **Әллә ни тиклем** (*йәки* **хәтле, саҡлы**) бик күп. *Әллә ни тиклем кеше. Әллә ни саҡлы бүрәнә.* **Әллә нисек** *ҡар.* **нисек** [3]. **Әллә нисә** *ҡар.* **нисә** 2.

● *Әллә йүкә өҙөлә, әллә ҡайыш өҙөлә.* Мәҡәл.

**ӘЛЛӘ** [2] *иниш.* Нимәләр хаҡында асыҡ белмәй, икеләнеп әйткәндә ҡулланыла. *Әллә, беҙгә уның тураһында бер ниндәй насар хәбәр килгәне юҡ.* Б. Бикбай. *[Ҡыҙ:] Әллә, сәс бәйләнгән булһа, ҡайҙа китер тип беләһең.* Т. Йәнәби. **Әллә инде** *һөйл.* Ни эшләргә белмәй аптырағанды, сараһыҙ булғанды белдерә. *Әллә инде, нишләргә? Әллә инде, ҡайһылай донъя көтөргә!*

**ӘЛЛӘ** [3] *мөн.* Уйҙың, фекерҙең бик үк ышаныс менән әйтелмәгәнен белдерә. *Исхаҡ бер егәрле генә кәләш алып ебәрһә, әллә был ҡарт та бер түргә менеп, рәхәтләнеп ултырыр ине.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘЛ-ЛӘ-ЛӘ** *ымл.* Һоҡланғанда йәки ғәжәпләнгәндә әйтелә. *[Мортаза:] Әл-лә-лә! Күрмәй торам, миҙалдар ҙа таҡҡанһың бит!* Ғ. Аллаяров. *[Бабай:] Әл-лә-лә! Бик оло һүҙ әйттең түгелме!* С. Агиш.

**ӘЛЛӘЛӘҮ** *ҡ. һөйл.* Әллә [2] лә әллә тип яуап биреү. *Һүҙеңде өҙөп әйт, әлләләп торма.*

**ӘЛЛӘСЕ** *иниш.* Ниндәйҙер һорауға икеләнеп, ҡыйыуһыҙ, тартынып ҡына яуап биргәндә ҡулланыла. *[Көтөүсе:] Зөлхизә апай,.. ошо минутта Зөлкәрнәй ағайым килеп төшһә, һин уға барыр инеңме? [Зөлхизә:] Әлләсе, һинең был һорауыңа ни тип яуап ҡайтарыуы ла ауыр миңә.* Н. Иҙелбай.

**ӘЛМИСАҠ** *и.* Тереклек яңы башланған, яратылған ваҡыт. *1917 йылда кешелектең әлмисаҡтан бирле йөрөткән өмөттәренең тормошҡа ашыу заманы башланды.* Ғ. Әмири. *Әлмисаҡтан ерҙә тартыш бара һәм тартышлы булыр киләсәк.* Й. Солтанов.

**ӘЛМОРОН** *и.* **1.** Роза сәскәләләр ғаиләһенә ҡараған ал сәскәле, алһыу оҙонса емешле, ваҡ сәнскәкле ҡыуаҡ; гөлйемеш. *Алтын көҙ ине. .. Агас япраҡтары ҡойолоп бөткән. Ә сейә менән әлморон, «икенсе йәшлек» кисереп, сәскә атып ултыра.* Я. Вәлиев. *Август-сентябрь айҙарында әлморон асыҡ ҡыҙғылт һары, ҡыҙыл емештәре менән әллә ҡайҙан күренеп ултыра.* «Совет Башҡортостаны», 1980, 16 сентябрь.

**2.** Шул ҡыуаҡтың емеше. *Тугайлыҡтарҙа һутлы тамсы булып балан, әлморон ҡыҙарып беште.* Ш. Янбаев.

**ӘЛМӘС** *с. диал.* Бәхетһеҙ.

**ӘЛТӘ** *и.* Күлдең ҡыш көнө лә туңмай ятҡан урыны. *Юлгилде лә күлдең аръягында ялтырап та ята әлтәһе* (Халыҡ йырынан).

**ӘЛУАН** [*гәр.*] *с. иҫк. кит.* Төрлө күп төрҙәге. *Ер йөҙөнән гәршә саҡлы әлуан-әлуан нур илә.* Ғ. Соҡрой.

♦ **Әлуан ниғмәт** *кар.* **ниғмәт** 2.

**ӘЛҮ** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Алыча. *Әлү кағы.*

**ӘЛҮК** *р. һөйл.* Әле үк, хәҙер үк. *[Ғатауллин:] Ауылды һағындырыр төҫлө түгелме? [Зәки:] Ай-һай, әлүк һағынһаң.* С. Агиш.

**ӘЛФИРАҠ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Айырылдыҡ тигән мәғәнәлә әйтелә. *Эй, матур саҡ! Әлфираҡ! Ҡалдың оҙаҡ.* Ш. Бабич. *Эй, дуҙәх, утлы тоҙаҡ, ҡалдың йыраҡ, ҡалдың йыраҡ! Әлфираҡ!* Ш. Фидаи.

**ӘЛХАСИЛ** [*гәр.*] *инш. иҫк. кит.* Ҡыҫҡаса әйткәндә; ҡыҫҡаһы. *Тәҙрәләр ябыҡ, ҡапҡалар бикле, әлхасил, ауыл тамам ташландыҡ бер хараба хәлендә ине.* М. Ғафури. *Анна Ивановна Раузаға ике йыл буйына хосуси дәрестәр бирҙе, ҡул эшенә өйрәтте. .. Әлхасил, уны үҙ балаһы кеүек тәрбиә итте.* Ғ. Рафиҡи.

**ӘЛ-ХӘЛ: әл-хәл булыу** *диал.* хәл яҡшырыу, рәтләнеү. *Тамаҡ туйып, әл-хәл булып алдым.*

**ӘЛХӘМ** [*гәр.*] *и. дини* Ҡөрьәндең беренсе бүлеге һәм шул бүлектән уҡылған доға. *Әлхәм уҡыу.*

**ӘЛХӘМДЕЛИЛЛА** [*гер.*] *ымл. дини* Аллаға дан тигән мәғәнәлә әйтелә. *Әлхәмделилләһи раббил гәләмин.*/Аллаға шөкөр, яҡшы. *[Ғелметдин:] Хәҙергә эшебеҙҙең барышы әлхәмделилла.* Ғ. Ныязбаев.

**ӘЛҺЕҘ** *с. һөйл.* **1.** Арманһыҙ, хәлһеҙ. *Әлһеҙ булыу. Әлһеҙ булып йығылыу.*

**2.** *күсм.* Бер нәмәһеҙ, мал-мөлкәтһеҙ, милекһеҙ. *Әлһеҙ ҡалыу.*

**ӘЛҺЕРӘНЕҮ** *к. кар.* **әлһерәү.** *Көскә еттек өйгә ҡайтып, әлһерәнеп эт кеүек.* Ш. Бабич.

**ӘЛҺЕРӘТЕҮ** *к.* **1.** Хәлде алыу, хәлһеҙ итеү; хәлдән тайҙырыу. *Тау битендә яҙ тантана итә, әлһерәтеп ҡояш бешерә.* С. Ҡудаш. **Быуынды әлһерәтеү** быуындың хәлен алыу, быуынға төшөү. *[Ҡымыҙ] бөтә тәнеңә тарала ла, быуындарыңды әлһерәтеп, рәхәт кенә, йомшаҡ ҡына итеп ҡыҙҙыра башлай.* Т. Хәйбуллин.

**2.** *эйһ. кар.* **әлһерәү** 1. *Көндәр эҫеп китте, әлһерәтә.* Р. Солтангәрәев.

**ӘЛҺЕРӘҮ** *к.* **1.** Эҫенән, арыуҙан һ. б. хәл бөтөү, хәлһеҙ булыу; хәлдән тайыу. *Сәлмән дә әлһерәп төшкән, битенән йылға булып тир аға.* З. Хисмәтуллин. *Әлһерәп, аяҡ-ҡулдары, бөтә ағзалары талыҡҡан булһа ла Таңдыса алға барыуында булды.* «Ҡуңып боға».

**2.** Олоғайып көс бөтөү, көсһеҙләнеү. *[Петруша — Саматка:] Әлһерәп бөткән шул ҡарттан ҡурҡып тораһыңмы? Төртөргә лә йығырға ине.* Ғ. Ибраһимов.

**3.** Артыҡ эҫенән һулыу, шиңеү (үҫемлектәргә ҡарата). *Көн салт аяҡ һәм эҫе. Шул тиклем эҫе, хатта Агиҙел буйындағы урмандар ҙа әлһерәп төшкән, .. йоҡомһорап ултыра.* Д. Исламов. *Пальма, ауыр башын түбән эйеп, ҡояш ҡыҙыуында әлһерәй.* Х. Ҡунаҡбай.

● *Ат эшләгәнгә эт әлһерәгән.* Мәҡәл.

**ӘЛҺЕРӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **әлһерәү** 1. *Әлһерәшеп йөрөп ятыу. Әлһерәшеп ултырыу.*

**ӘЛӘЙ** *ымл.* Ҡапыл ауыртыу һиҙгәндә әйтелә; әләү. *Әләй, ҡулымды ҡыҫтың!*

**ӘЛӘЙКӘ** *и. диал.* Сынаяҡ аҫты (*кар.* **сынаяҡ**).

**ӘЛӘЙҺӘ** *инш. һөйл.* Улай булһа. *[Мәғфүрә:] Ярар, әләйһә. Артыҡ-борток аҡсаңды йыя бар.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘЛӘЙҺӘҢ** *инш. һөйл.* Улай булғас. *[Котош:] Ярар, әләйһәң, һуҙ ыңғайында ғына әйтеп китәйем тигәйнем.* Р. Ниғмәти. *[Батша — байға:] Әләйһәң, көс һынашып ҡарайыҡ* (Әкиәттән).

**ӘЛӘКЛӘҮ** *к. диал.* **1.** Ошаҡлау. *Ағаһын әсәһенә әләкләгән.*

**2.** Үсекләү.

**ӘЛӘКСЕ** *и. диал.* Ошаҡсы.

**ӘЛӘМ** [1] [*гәр.*] *и. иҫк.* Байраҡ. *Ҡыҙыл әләм.* ■ *Беҙ еңәбеҙ. Беҙ еңергә тейеш. Төшөрмәгеҙ Ленин әләмен.* Х. Ҡунаҡбай. *Беҙ ҡаҙарбыҙ ал әләмде нык, батыр йәш ҡул менән.* Ғ. Амантай.

**ӘЛӘМ** [2] [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡайғы. *Төрлө яҡтан баҫмаһа гәм, һис бер кеше сикмәҫ әләм!* М. Ғафури.

**ӘЛӘМ-ҺӘЛӘМ** *с. кар.* **алам-һолам.**

**ӘЛӘН-БОРХАН** *р. һөйл.* **1.** Тәртипһеҙ рәүештә. *Эс ҡабартып, бурҙай уйнатып, әлән-борхан урам буйлатып, хозур йәшәй икән ҡорҙашым.* С. Кулибай.

**2.** Ашыҡ-бошоҡ, унан-бынан ғына. *Әлән-борхан ғына ҡапҡылап алыу. Әлән-борхан кейенеү.*

♦ **Әлән-борхан булыу** ашығыу, ығы-зығы килеп ҡабаланыу. *Батый еңгәләр ҡоҙаларын [саҡырабыҙ тип] унан да, бынан да йыйынып, әлән-борхан булып яталар.* Ғ. Дәүләтшин.

**ӘЛӘН-ЕЛӘН** *р.* Бик тиҙ, тирә-яҡҡа ҡаранып алғансы. *Әлән-елән елеп үтһә бер көн, иртәгеһе килеп [баҫа] сиратҡа.* С. Кулибай.

**ӘЛӘҮ** *ымл.* Ҡапыл ауыртыу һиҙгәндә әйтелә; әләй. *Әләү, тубыгымды төкөнөм!* ■ *Әләү, әсәкәйем, өҙә бит сәсемде!* И. Ғиззәтуллин.

**ӘЛӘФ-ТӘЛӘФ: әләф-тәләф булыу** күпләп юҡҡа сығыу, юғалыу; әрәм-шәрәм булыу. *Тауар станцияла оҙаҡ ятып әләф-тәләф була.* **Әләф-тәләф итеү** күпләп юҡҡа сығарыу, юғалтыу; әрәм-шәрәм итеү. *Быяланы әләф-тәләф итеп бөтөрә төҙөүселәр.*

**ӘМЕР** [*гәр.*] *и.* **1.** Ҡәтғи бойороҡ. *Батша әмере. Әмер биреү. Әмерҙе үтәү.* ■ *Теҙелделәр Урал батырҙары һәм Уралдың әмерен көттөләр.* Р. Ниғмәти. *Егет батша әмерен һөйләп биргәс,*

*кәләше: — Ауыр эш ҡушҡан,— ти, ярар, ҡайғырма, үтәрбеҙ, ти* (Әкиәттән).

**2.** *дини.* Алла, яҙмыш ҡушыуы. *Зәйнәп инде донъяның, кара тәкдирҙең әмеренә буйһоноуҙан башҡа сара тапмай.* М. Ғафури.

□ **Әмер итеү** бойороҡ биреү, бойороу. *[Мәсем хан:] Әмер итәм барығыҙға ла атланырға хәҙер аттарға.* С. Мифтахов.

**ӘМЕШ** *р. диал. ҡар.* **мәмеш.**

**ӘМЗӘ** *и.* Ләлә һымаҡтар ғаиләһенә ингән күк йәки һары сәскәле, ялтыр ҡыяҡ япраҡлы, һуған һымаҡ тумалсаҡ тамыры ашауға яраҡлы үҫемлек (иртә яҙ, ҡар аҫтында уҡ сыға башлай). *Таулыҡтарҙа тәмле әмзә үҫә, уйпат ерҙәрендә ҡуҙғалаҡ.* Р. Ниғмәти.

**ӘМИР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Көнсығыш мосолман илдәрендә ғәскәр башлығы һәм хаким титулы, шулай уҡ ошо титулды йөрөткән кеше. *Бохара әмире.*

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ӘМИРАТ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **әмирлек.**

**ӘМИРЛЕК** *и. кит.* Башында әмир торған дәүләт йәки биләмә. *Хорезм әмирлеге.*

**ӘММӘ** *терк.* **1.** *ҡар.* **ләкин.** *Заятүләк яҡ-яғына ҡарай, әммә унда Һыуһылыу күренмәй ине инде, ти.* «Заятүлек менән Һыуһылыу». *Әммә унан да [нәпсенән дә] яуыз бер нәмә бар, ул әскелек.* Ш. Бабич. **Әммә ләкин** (*йәки* **мәгәр**) теркәүестең мәғәнәһен көсәйтеү өсөн ҡулланыла. *[Егет:] әллә ни күргән юҡ-юҡлығын, әммә ләкин беҙҙең балалыҡ дәүеренә замандың ауыр мәле тура килде.* Ә. Гәрәев. *Күп күрҙем, әммә мәгәр аҙ белдем.* Б. Бикбай.

**2.** *ымл. мәғ.* Һүҙҙе көслө тойғо менән әйткәндә ҡулланыла; үтә, бик. *Әммә рәхәт!* ■ *Әммә күңелле! .. Ана янына салғыһын, .. тотондо сабырға.* Т. Йәнәби.

**ӘМҪӘЛ** [*ғәр.*] *и. ҡар.* **мәҫәл.** *Үкереп, утта янып ята үгеҙ. Был әмҫәлгә ҡушып яҙам бер-ике һүҙ.* М. Ғафури.

**ӘМӘЙЛЕК** *и.* Һул яурындан уң ҡултыҡ аҫтына төшөрөп кейә торған шау тәңкә-мәрйенле ҡатын-ҡыҙ биҙәүесе; дәүәт.

**ӘМӘЛ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Нимәнелер эшләү, башҡарыу юлы; сара. *[Ҡатын:] Ярар, ҡыҙым, борсолма, үҙем бер әмәлен уйлап ҡарармын әле.* М. Тажи. *Был йыртҡысҡа бер-бер әмәл тапмағанда, барыбыҙҙы ҡырып бөтөр иртән таңда.* «Бабсаҡ менән Күсәк». / Нимәнелер башҡарыу мөмкинлеге. *Буран ҡотора, күҙ асыр әмәл юҡ.* **Р.** Солтангәрәев. *[Бай:] Йә, батша, эште һуҙма. Инде минең көтөр әмәлем ҡалманы* (Әкиәттән).

**2.** Дауалау, имләү саралары; им, им-том. *[Гөлбикә:] Күрән бейәнең ҡолонона һаҡау булған. Өйҙә торһаң, .. бер төрлө әмәл яһар инең, исмаһам.* Д. Юлтый. *[Үгәй инә — сихырсыға:] Сөйәлбайҙы үлтерер өсөн миңә берәй әмәл өйрәт* (Әкиәттән).

**3.** *кит.* Киләсәккә булған ышаныс; өмөт. *Таң йондоҙо кеүек яҡты әмәлдәрем юлында эшләп үлтырам-үлтырам да .. һауа һуларға сығам.* Б. Ишемғол.

♦ **Әмәлгә баҡҡандай** (*йәки* **ҡалғандай, ҡаршы**) бер ҡыйынлыҡ янына икенсе ҡыйынлыҡ килеп сыҡҡанда әйтелә. *Мулла быуа аша сыға башлай. Әмәлгә ҡалғандай, аяғы тайып китә бит быныһ — шап быуа уртаһына.* Б. Бикбай.

**ӘМӘЛЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **әмәлләү** 3. *Ауырыуҙы бағымсынан әмәлләтеү.*

**ӘМӘЛЛӘҮ** *к.* **1.** Нисек тә юлын табып, яйын килтереп, нимәлер эшләү, булдырыу. *[Завод] техник яҡтан ҡулайлаштырылмаған бер бинала үҙенә ҡойоу цехы әмәлләргә мәжбүр булды.* Ә. Вәли. *[Мәрйәм:] Миңә ниндәй ярҙам кәрәк. .. Таһынды ҡулымдан килгәнсә, әмәлләп ҡуйҙым инде.* Ә. Мирзаһитов.

**2.** Һупалап, арлы-бирле генә нимәлер эшләү; этмәләү. *Арбаларҙың артын кире ҡайтарып, ҡыуыш әмәлләнеләр.* А. Таһиров.

**3.** Им-том итеү, имләү. *[Нәсимә:] Ҡана, ҡайһығыҙҙың ҡайһы ере ауырый, әмәлләп ташлайым.* Һ. Дәүләтшина. *[Имсе:] Өшкөрөп-төкөрөп тоҙ ҙа бирҙем [Сибәғәткә], әмәлләп бутҡаһына һалдырып .. ашаттым. Юҡ, шифаһы теймәгәс, теймәй икән шул.* Б. Бикбай.

**ӘМӘЛЛӘШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **әмәлләү** 1, 2.

**ӘМӘЛ-САРА** *и. йыйн.* Төрлө сара. *Әмәл-сара табып Юшатыр аша Морапатал яғына сыҡҡас, Баязиттың әсәһен, кәрендәшен эҙләп табырға булдым.* С. Кулибай.

**ӘМӘЛСЕ** *и.* Төрлө әмәл (3 мәғ.) менән им-том иткән кеше. *Халыҡ ул әбейҙе [сихырсыны] бик һөйләй, бик әмәлсе, ти. Ер аяғы — ер башы ерҙән килеп ҡаратаһар.* Һ. Дәүләтшина.

● *Ауырыһаң әмәлсе күп.* Әйтем.

**ӘМӘЛСЕЛ** *с. ҡар.* **тернәксел.**

**ӘМӘЛ-ТАҠЫЛ** *и. йыйн. һөйл.* Им-том, дауа.

□ **Әмәл-таҡыл итеү** әмәлләү, имләү. *[Ғәрифә:] Юҡ инде, атаһы, әмәл-таҡыл итәйек, ныҡлап ауырып китеүең бар бит.* Н. Мусин.

**ӘМӘЛҺЕҘ** *с.* Әмәлдән (1 мәғ.) мәхрүм; сараһыҙ. *Әмәлһеҙ булыу.* ■ *[Маһипәрүәз — Зәкигә:] Ағас йығайым тип урманда ҡалғайным, әҙерәк йыҡтым да, йәшен әмәлһеҙ иткәс, ҡайтып киттем.* К. Кинйәбулатова.

**ӘМӘН** *р. иҫк.* Хас, нәҡ. *Сәхрәләрҙә бер гөл күрҙем, әмән дә ул алтынға манған* (Мөнәжәттән).

**ӘНБИӘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Пәйғәмбәр. *Йәрҙе һөймәк, гишыҡ тотмаҡ — әнбиәләр сөннәте* (Мөнәжәттән).

**ӘНИС** [*рус.* ⟨ *гр*] *и.* **1.** Сатыр сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған, эфир майы биргән хуш еҫле үлән. *Ябай әнис.*

**2.** Шул үләндең орлоғо. *Әнис майы.*

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

♦ **Әнис алмаһы** алманың бер сорты һәм уның эскелтем тәмле алмаһы. *Үтә йоҡа итеп теленгән хуш еҫле әнис алмаһы сәй янына [үлтыртылды].* З. Биишева.

**ӘНКӘЙ** *и. диал.* Әсәй.

**ӘНКӘЛ** *и. диал.* Әре һалма.

**ӘНТЕК** *с. һөйл.* **1.** Кәрһеҙ, эргендек. *Әнтек мал.*

**2.** *күсм. диал.* Йүнһеҙ. *Эшләмәне, әнтек, бер белгәне алдашыу ине.* Б. Бикбай.

**ӘНУАҒ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Һәр төрлө. *Ашауэсеү фәләндәрҙең күреп үткәрҙем әнуағын.* М. Ғафури.

**ӘНҮӘР** [*ғәр.*] *с.* **1.** *иҫк. кит.* Нурлы. *Салауат — Урал балаһы, Салауат — йөрәк ҡәғбәһе, ерҙә әнүәр ҡәүҙәһе, күктә зәңгәр шәүләһе.* Ш. Бабич.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ӘНҺАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Йылға, һыу. *Иҙел буйы — һәр төрлө ағастар бар, йәннәт кеүек ағас аҫты — аҡҡан әнһар.* М. Ғафури.

**ӘНӘСӘ** *и. диал.* Ҡул һалмаһы (*ҡар.* **һалма** 1).

**ӘҢГЕМӘ** *и. ҡар.* **әңгәмә.**

**ӘҢГЕРӘҮ** *к. диал.* Әлһерәү.

**ӘҢГЕШ** *и. диал.* Иңкеш.

**ӘҢГӘМӘ** *и.* **1.** Ике йәки күмәк кеше һөйләшкән төрлө һүҙ. *Әңгәмә ҡороу. Әңгәмәгә ҡерешеү.* ■ *Ауыл ҡуҙғый. Илдең һыҡрауы тағы ла көсәйҙе. Халыҡ араһында сәнгем-сөңгөм әңгәмәләр ҡубәйҙе.* Т. Хәйбуллин. / Үҙ-ара фекер алышыу, аң бирешеү өсөн һөйләшкән һүҙ. *[Дусмәтов] блиндаждан блиндажға, окоптан окопҡа йөрөп .. әңгәмәләр үткәрҙе.* В. Ғирфанов. *Почта йәшнигенә еткәс, һөйләшеп торҙо улар. Хатты нисек һалыр өсөн әңгәмә ҡорҙо улар.* С. Кулибай. **Әңгәмә һатыу** күмәкләшеп һөйләшеү; гәпләшеү. *Ял көнө ине. Дуҫтарым менән оҙаҡ әңгәмә һаттыҡ.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Төрлө хәл тураһында һөйләгән хәбәр. *Әңгәмә һөйләү.* ■ *Б. Бикбайҙың .. интонацияға бай, аҡыллы әңгәмәһен тыңлайым һәм ағымлы йөҙөнә ҡарайым.* Ә. Вахитов. *[Дәрүиш — Тәңкәбикәгә:] Әүәл бер әңгәмә тыңла күптән үткән хәлдәр тураһында.* М. Кәрим.

**3.** *күсм.* Ҡыҙыҡ ваҡиға, ҡыҙыҡ хәл. *Улар [Рәйсәләр] юл әңгәмәләрен һөйләшеп, көлөшә башланы.* Һ. Дәүләтшина. *«Тукта,— тим мин,— бер әңгәмә булһын, [бүрене] тереләй алып ҡайтырға кәрәк.* С. Кулибай.

**ӘҢГӘМӘЛӘҮ** *к.* Ҡыҙыҡ итеү; шаяртыу, мәрәкәләү. *Ҡәйнеш булғас, .. үйнап һүҙ ҡушҡан сағың да, әңгәмәләгән сағың да була.* Т. Хәйбуллин.

**ӘҢГӘМӘЛӘШЕҮ** *к.* **1.** Икәүләп йәки күмәкләп һүҙ һөйләшеү, әңгәмә алып барыу, гәпләшеү. *Әңгәмәләшеп ултырыу.* ■ *[Өмәселәр] әңгәмәләшеп, лабырлашып, ашап-эсергә тотондо.* Һ. Дәүләтшина. / Үҙ-ара фекер алышып һөйләшеү. *Балалар менән төрлө темаға әңгәмәләшергә кәрәк.* «Совет Башҡортостаны», 1971, 16 февраль.

**2.** Үҙ-ара шаярып һөйләшеү; мәрәкәләшеү. *Ҡәйнешең булғас, .. ниңә әңгәмәләшмәҫкә.* Т. Хәйбуллин.

**ӘҢГӘМӘСЕ** *и. һөйл.* **1.** Кем менәндер әңгәмә үткәргән кеше.

**2.** *с. мәғ. ҡар.* **әңгәмәсел** 1.

**ӘҢГӘМӘСЕЛ** *с.* **1.** Һөйләшергә яратыусан, һүҙгә оҫта. *Әңгәмәсел кеше.*

**2.** *диал.* Мәрәкәсел. *Әңгәмәсел булыу.* ■ *[Нәсимә] әңгәмәсел бит. Уның һәр һүҙенә үпкәләй китһәң. .. Барыбыҙ менән булаша ул.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘҢГӘҺЕРҘӘЙ** *с. диал.* Әзмәүерҙәй.

**ӘП: әп итеү** *шаяр.* үбеү. *Ай-һай, түйығыҙ, әп итешеп ҡуйығыҙ!* Р. Ғарипов.

**ӘП-** *киҫ. ҡөс.* Ә- өнө менән башланған сифатҡа йәки рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһен бирә. *Әп-әҙ. Әп-әйбәт.*

**ӘПЕ** *с. диал.* Ыпыҡ.

**ӘПЕН-ТӨПӨН** *р.* Тейешенсә эшләмәй; арлы-бирле, улай-былай ғына. *Күперҙе һаман йүнләп нығыта алмайҙар. Йыл һайын әпен-төпөн генә итеп һалған булалар ҙа, яҙ еттеме — ташҡын ағыҙып алып китә.* Ғ. Ибраһимов / Унан-бынан ғына ашығып; ашыҡ-бошоҡ. *Сейле-бешле ашты әпен-төпөн генә ашағандар ҙа былар [батырҙар], йоҡларға ятҡандар* (Әкиәттән).

**ӘПЕҮӘ** *с. диал. мыҫҡ.* Ыпыҡ.

**ӘПИРЕҮ** *к. ҡыҫҡ. ф. һөйл.* Алып биреү. *Әхмәҙулла бабай ҡаҙаҡлап тора, мин уға таҡта әпиреп торам.* Ә. Вахитов.

**ӘПКИЛЕҮ** *к. ҡыҫҡ. ф. һөйл.* Алып килеү. *Гөләйшә инәйемә һыу әпкилеп тоттором.* К. Кинйәбулатова.

**ӘПКИТЕҮ** *к. ҡыҫҡ. ф. һөйл.* Алып китеү. *[Нәфисә:] Хажисолтан кис бейәбеҙҙе әпкитеп ҡуйҙы.* Я. Хамматов.

**ӘПКӘЛӘЙ** *и.* Ярамһаҡ, ҡуштан.

**ӘППӘКЕС** *и. диал.* Әтмәкәй.

**ӘППӘР: әппәр итеү** *дини һөйл.* «аллаһы әкбәр» тип доға ҡылыу.

**ӘПРӘКӘНГӘ** *р. диал.* Файҙаһыҙға, бушҡа. *Әпрәкәнгә йөрөү.*

**ӘПРӘМ** *и. диал.* Дегәнәк.

**ӘПСЕН** [1] [*фарс.*] *и. иҫк.* Им, сихыр. *[Зәрҡум:] Һиңә башлы таяғын бирһә, шуны алырһың. Ул таяҡтың әпсене шул: һыуға төшһәң, батмаҫһың, утҡа инһәң янмаҫһың.* «Урал батыр».

**ӘПСЕН** [2] *и. диал.* Өпсөн. *Аҡ ял ғына саптар ай атымды әпсендәре юҡ тип һатмағыҙ* (Халыҡ йырынан).

**ӘПСЕНЛӘҮ** *к.* **1.** Әпсен [1] әйтеп имләү, өшкөрөү. *Әпсенләп һыу һибеү.*

**2.** *күсм.* Еренә еткереү, килештереү. *Солтан Вахитович яйлап ҡына, әпсенләп кенә ҡыҙҙырылған балыҡ ашағандан һуң, кәйефләнеп, ҡорһағын киреп ултыра.* Ш. Насыров.

**ӘПСЕН-ӨПСӨН** *и.* Бала-саға бер ерен ауыртҡанда имләгән булып, йыуатып әйтелә торған һүҙ. *Әпсен-өпсөн, бүрәнә баҫһын, ҡаны сыҡһын, антырак-тинтерәк, тик тормаһаң, шул кәрәк.*

**ӘПСЕН-ТӨПСӨН** *и. һөйл. ҡар.* **әпсен-өпсөн.**

**ӘПСӘЙ** *и. һөйл.* Әсәй. *[Камил:] Ҡал, Ғариф, әпсәң бәпесләргә йөрөй, йомоштарына барғыларһың.* Р. Ниғмәти.

**ӘПТЕК-ҺӘПТЕК** *и. диал. йыйн.* Сүп-сар.

**ӘПТӘНЛӘҮ** *к. диал.* Һәптәнлеү. *Атайым .. киҫкә табан әптәнләп ике йәйен балыҡ күтәреп ҡайтты.* Д. Юлтый.

**ӘПШЕ** *и. ҡар.* **зәңге.** *Берәүһенең .. тештәрен әпше ауырыуы ашағанмы — ҡойолғандар.* А. Таһиров.

**ӘПШЕГҮР** *с. диал.* Әшлекһеҙ.

**ӘПӘ** *и. диал.* Ыпыҡ.

**ӘПӘЙ** *и. диал.* Икмәк. *Әпәй ашау.*

♦ **Әпәй шүрлегенә менеп төшөү** *һөйл.* ауыҙға, танауға һуҡҡанды белдерә. *Юлай Әпрәйҙең әпәй шүрлегенә бер менеп төштө. Малайҙың ирендәре күбеп сыҡты, танауынан ҡан китте.* И. Ғиззәтуллин.

**ӘПӘК** *и. бал.* Икмәк.

**ӘПӘКӘЙ** *и. ирк.* Икмәк. *Беҙ бала саҡта, беҙҙең атайҙар ҡайҙандыр 10—20 ҡаҙаҡ, ярты*

*бот он тапһалар, алтын тапҡандай ҡурәләр ине. Шуның өсөн беҙ уны «әпәкәй» ти торғайныҡ.* Ғ. Ишбулатов.

**ӘПӘКӘЙ-СӨПӘКӘЙ, әпәкәй ҙә сөпәкәй** *р.* Үҙ-ара иркәләшеп, бер-береһен ныҡ ҡурсалап торған кешеләргә шаяртып әйтелә. *Улар әпәкәй ҙә сөпәкәй йәшәп яталар.*

**ӘПӘЛӘ** *с. диал.* Иҫәр, ахмаҡ. *Эй, әпәлә, кемгә тотторған төйөнсөгөн.* Т. Килмөхәмәтов.

**ӘПӘЛӘНЕҮ** *ҡ. диал.* Ҡабаланыу, өтәләнеү. *[Миҙхәт] үҙенең янына әпәләнеп килеп еткән Моргуновка .. ҡайнар аш әҙерләтергә ҡушты.* Б. Рафиҡов.

**ӘПӘРӘКЛӘҮ** *ҡ. диал.* Ҡаты һүгеү.

**ӘПӘҮ** *ымл.* Балаға иркәләп, йәләп әйтелә.

**ӘПӘҮЛӘҮ** *ҡ.* Йәлләп ҡурсыу, ныҡ иркәләтеү. *Әпәүләп тороу. Әпәүләп үҫтереү.* ■ *Үпкәләп Гөлсөм тәҙрә янына барҙы ла баҫты. .. Әпәүләһәк тә беҙҙе тыңламай.* М. Дилмөхәмәтов.

**ӘПӘҮЛӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **әпәүләү.** *Беҙ ..бер-беребеҙҙе димләшеп, әпәүләшеп тора торған кешеләр түгелбеҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘР** [1] *и.* Асыуланып, әрләп әйткән һүҙ. *Әр ишетеү.* ■ *Ашағаның — ҡаты-ҡото икмәк, түшәгең — кеше түпһаһы, йән аҙығың — әр ҙә ҡарғыш.* Ш. Насыров. *Мең ғазаплы, әрнеүле был яҙмышыма әр, ҡарғыш, ләғнәт уҡып ваҡһынмаймын.* Б. Мирзанов.

**ӘР** [2] *[ғәр.] и. ҡар.* **ғәр.** *Әргә тейеү.* ■ *Әгәр әрнемәһә, әгәр әр белмәһә, ул йөрәк кемгә кәрәк?!* Н. Нәжми.

**ӘРБӘ** *и. диал.* **1.** *ҡар.* **ҡәбәк** 1. *Арыш әрбәһе.*

**2.** Ҡурпы. *Бесәндән һуң ямғырҙар яуып, әрбә үҫеп китте.*

**ӘРБӘК-ҺӘРБӘК** *с.* **1.** Ҡараңғылы-яҡтылы булған, асыҡ күренмәгән, томанлы (иртәле-кисле төн менән көн алмашынған, томан төшкән, ҡар яуған һ. б. ваҡытҡа ҡарата). *Әрбәк-һәрбәк ваҡыт.* ■ *Түбәндә, яҡында ғына тау йылғаһы үкерә, ләкин әрбәк-һәрбәк таң яҡтыһында ул күренмәй.* Н. Мусин. **Әрбәк-һәрбәк төшөү** ҡараңғы төшөү, ҡаранғыланыу. *Күҙ бәйләнеп, әрбәк-һәрбәк төшкәс, егеттәр менән ҡыҙҙар, төркөм-төркөм булып, берәүҙәре усаҡ янына йыйыла башланы, икенселәре ҡармаҡ һалырға юл алды.* Ғ. Вәлиев.

**2.** Әҙ-мәҙ, һирәк-һаяҡ ҡына булған. *Әрбәк-һәрбәк болот. // Әрбәк-һәрбәк яуыу.* ■ *Әрбәк-һәрбәк болотло, еләҫ көн кискелеккә ауышҡайны инде.* Д. Исламов. *Әрбәк-һәрбәк кенә яуған ҡар таң алдынан көслө буранға әйләнде.* Н. Мусин.

**3.** *р. мәғ.* Беленер-беленмәҫ, саҡ ҡына. *Уянғанымда өй эсе саҡ әрбәк-һәрбәк яҡтыра башлағайны.* Н. Мусин. / Әҙ-мәҙ, саҡ-саҡ ҡына (күҙҙең күреү һәләтенә ҡарата). *Әсә яулыҡ осо менән генә күҙҙәрен һөрттө: — Атайың менән ағайҙарыңдың ҡайғыһы бөтөрҙө [күҙҙәремде]. Әрбәк-һәрбәк кенә күрәм.* Т. Килмөхәмәтов.

**ӘРБӘНЛӘҮ** *ҡ. һөйл.* Ялт-йолт килеп, күҙгә салыныу. *Күҙ алдында әрбәнләү.* ■ *Ағайымдың арыҡ, оҙон кәүҙәһе .. берсә ҡара таҡта янында, берсә ширлек артында ултырған балалар алдында әрбәңләй.* З. Биишева.

**ӘРБӘН-ҺӘРБӘҢ** *р. диал.* Әрбәк-һәрбәк.

**ӘРГЕНДЕК** *с.* Көсө, хәле әҙ булғанлыҡтан эшкә ярамаған; кәрһеҙ. *Әргендек мал.* ■ *Бешмәгән! Әргендек! Һинең кеүек малайҙар күбә тарттыра!* Р. Солтангәрәев.

**ӘРГЕНДЕКЛӘНЕҮ** *ҡ. һөйл.* Әргендеккә әйләнеү, әргендек булыу.

**ӘРҒӘЗИМБАЙ** *и. диал.* Умырзыя. *Әрғәзимбай сәскә атҡан.*

**ӘРҘӘНӘ** *и.* **1.** Ҡырҡылған, ботаҡтарынан таҙартылған ағас (ғәҙәттә утынға тотола). *Имән әрҙәнә. Ҡайын әрҙәнә. Әрҙәнә ҡырҡыу. Әрҙәнә әҙерләү.* ■ *[Бәгиҙә:] Нәҙергол ағайым ике ат менән әрҙәнә ташый, беҙ ул килтергән утынды Сибәғәт ҡоҙа менән күмер итеп яндырабыҙ.* И. Ғиззәтуллин. *Һәр кемдең лапаҫ башында ҡышҡа етерлек бесән, һалам, ишек алдында шаҡәрҙәй ҡайын әрҙәнәләре өйөлгән.* Р. Низамов.

**2.** Ҡырҡып өйгән утын. *Ярып өйөп ҡуйған әрҙәнә өҫтөнә менеп, йоҡларға яттым.* Т. Йәнәби.

**ӘРЕ** *и.,* **әре ҡорт.** Бал ҡортоноң атаһы; ата ҡорт. *Әреләрҙең берҙән-бер эше — ҡорт инәһе донъяға осоп сыҡҡанда уның артынан осоу.* Ф. Иҫәнғолов.

**ӘРЕК** *и. диал.* Таяу, терәк.

**ӘРЕКМӘН** *и. ҡар.* **дегәнәк** 1. *Әрекмән тамыры. Әрекмән япрағы.*

**ӘРЕМ** *и.* Әсе тәмле, ҡырҡыу еҫле, аҡһыл-йәшел тетмәкәй япраҡлы эре ҡый үләне. *Ваҡ әрем. Күк әрем.* ■ *Ай, Уралҡай.., ят ер сәскәһенән миңә әремең дә кәҙерлерәк!* А. Игебаев. *Беҙ ашаған сохарый әремдәрҙән әсерәк* (Бәйеттән).

◆ **Аҡ әрем** күкһәүел. **Әрем тел** зәһәр һүҙле, әсе телле кешегә ҡарата әйтелә. *Әрем телле ҡыҙ.* ■ *[Фәрзәнә:] Шул әрем телдәрҙең әргәһенән тиҙ генә сығып китеп буламы ни?* Н. Мусин.

● *Тыуған илдең әреме лә баллы була.* Әйтем.

**ӘРЕМЛЕК** *и.* Әрем күп булып үҫкән урын.

**ӘРЕПЛӘШЕҮ** *ҡ.* Ҡаршы һүҙ әйтеп әрләшеү, ирәгәләшеү. *[Сәйҙә:] Ул Нәби бигерәк киҫекһеҙ нәмә. Әйтһәң, әрепләшеп бара.* М. Буранғолов. *Вазифа тағы ла бер нисә минут әрепләшеп торҙо ла, Ғимайҙа бер генә төрлө лә йомшаҡлыҡ әҫәре күрмәгәс, лышҡ-лышҡ илап сығып китергә мәжбүр булды.* И. Насыри.

**ӘРЕШКЕ** *и. диал.* Рәшә себененең ҡорто.

**ӘРЙӘ** *и.* **1.** Нимәләр һалып һаҡлар өсөн таҡтанан, ҡабыҡтан дүрткелләп яһаған ҙур ҡумта, йәшник. *Иркәбай өҫтәл аҫтындағы әрйәнән бер шешә һурып сығарҙы.* Ғ. Әмири. *Мин ... ҡараүат аҫтына инеп, үҙемдең бөтә үйынсыҡтарым һалынған әрйәне алып сығам.* М. Кәрим. *Үкереп, ярһып торған машинаға әрйә-әрйә снаряд тейәлде.* Р. Ниғмәти.

**2.** Иген, он һалыу өсөн таҡтанан, ҡабыҡтан яһалған ҙур һауыт; алап, лар. *Бер әрйә иген. Бер әрйә он.*

**3.** Йөк машинаһының йөк тейәй торған йәшнигe. *Машина әрйәләренә .. баштары марлялар менән сырмалған кешеләр көмрәйешеп ултырған.* Ф. Иҫәнғолов.

**4.** *ҡар.* **марке.**

**ӘРКЕ** *и.* Дегет ҡайната торған һауыт.

**ӘРКӘТЕҮ** *и.* Солоҡ башында торғанда төрлө кәрәк нәмәне күтәреп-төшөрөп тора торған оҙон, нәҙек бау.

**ӘРЛЕ** *с. һөйл.* **1.** Оят, әҙәп һаҡлаусан; тыйнаҡлы.

**2.** Һаҡлап, ҡәҙерләп кейеүгә тәғәйенле; ҡәҙерле. *Әрле кейем. // Әрлегә тотоу.*

● *Әрле әрләнгәнсе, әрһеҙ ашап туйған.* Мәҡәл.

**ӘРЛӘН** *и. диал.* Ирлән *Әрлән өңө.*

**ӘРЛӘНЕҮ**[1] *ҡ. төш. ҡар.* **әрләү.** *Халыҡ Ямал яҡлы була башлағас, ире: — Бисәләрҙән әрләнергә башыма тай типмәгән әле! — тип, клубтан сығып тайҙы.* М. Тажи.

**ӘРЛӘНЕҮ**[2] *ҡ. һөйл.* Оят-әҙәп һаҡлау, тыйнаҡлы булыу.

**ӘРЛӘҮ** *ҡ.* Асыуланып, ауыр һүҙҙәр әйтеү; тиргәү, һүгеү. *Әхәт кемдәрҙелер әрләп тә алды: — Оят бит, егеттәр, бынау көндә биш сәғәт ултыралар.* Р. Солтангәрәев. *[Һыуһылыу:] Ебәрә күр, ер улы, атам әрләр, китәйем, тиҙерәк ҡайтып етәйем.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

♦ **Эттән алып, еткә һалып әрләү** *йәки* **эт итеп әрләү** *ҡар.* **эт.** *Арғы остоң Байғужа ҡайнаға мине эт итеп әрләне бит, ҡартайған һайын бәйелең аҙҙы, килен, ти.* Һ. Дәүләтшина. *Батша Незнайканы эттән алып, еткә һалып әрләп китә* (Әкиәттән).

**ӘРЛӘШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **әрләү.** *Тимер мейестең ике яғына баҫҡан ике ҡатын сарылдап әрләшә.* А. Карнай.

**ӘРМЕ** [*рус.* армия ⟨*фр.*⟩] *и. һөйл.* Армия. *Ҡаһым каруан һарайҙағы әрменең башында Буранғол урынына юлбашсы булып ҡала.* М. Буранғолов. *Әрмеләргә барып сәс еткерҙем, сәскенәйем етте үрмәгә* (Халыҡ йырынан).

**ӘРМӘК** *и.* **1.** Йөндән һирәк итеп һуҡҡан ҡалын тауар. *Әрмәк һуғыу. // Әрмәк тауар.*

**2.** Һирәк йөн тауарҙан теккән сәкмән. *Әрмәк тегеү.*

**ӘРМӘН** *и.* Әрмәнстаның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе. *Әрмән халҡы. Әрмән ҡатыны. Әрмән теле.*

**ӘРМӘНДЕ** *и.* Суғырмаҡ тәнле, тәлмәрйенгә оҡшаған ер-һыу йәнлеге. *Әрмәнде һуҙған телен, әйҙә, күн инде, себен.* З. Биишева.

**ӘРМӘС** *и. диал.* Балаҫ.

**ӘРНЕНЕҮ** *ҡ. ҡар.* **һыҙланыу.** *Яраһынан әрненә.* ■ *Батыр өсөн алған яра түгел, еңелеү бирә, буғай, әрненеү.* Т. Морат.

**ӘРНЕТЕҮ** *ҡ.* **1.** Янған һымаҡ итеп әсеттереү, ауырттырыу. *Әрнетеп һыҙлау.* ■ *Бала саҡтан ергә түгел, йәшем йөрәгемә тамды, һәм әрнетеп ут шикелле, шунда мәңге дөрләп ҡалды.* Р. Назаров.

**2.** *күсм.* Рәнйетеү, әсендереү. *[Зөһрә — Гөлнурға:] Кисәге ҡыланышың менән килешә алмайым. Һин атайыңды ныҡ әрнеттең.* Р. Ниғмәти. / «Йөрәк, йән, күңел» һүҙҙәре менән рухи ғазапҡа дусар иткәнде белдерә. *Йөрәкте әрнеткән хис. Йән әрнеткес ауыр хәл.*

**ӘРНЕҮ** *ҡ.* **1.** Янған һымаҡ итеп, әсеттереп ауыртыу. *Әрнеп һыҙлау. Дарыу әрнеүҙе баҫты.* ■ *Ғәлиҙең ҡулдары йылынмай, семетеп-семетеп әрней.* Ә. Вәли. *Тирләп сәберсетеп бөткән беләктәре, баш өҫтөндә ут шикелле янып торға ҡояш ҡыҙыуында һулҡылдап-һулҡылдап тағ ла нығырак әрней башланы.* М. Тажи.

**2.** *күсм.* Үкенесле, ауыр тойғо кисереү; үртәнеү, әсенеү. *Әрнеп илау. Әрнеп әйтеү.* ■ *Рамаҙан бураҙнаға күмелгән эре башаҡтарға ҡара әрнеп торҙо.* Р. Низамов. *Тәҙрәмде асып тың лайым, ишетәм — шундай әрней, әрней бер кеше Бала кеүек илай, бала кеүек битен йыуа уны күҙ йәше.* Ғ. Хәйри. / «Йөрәк, йән, күңел» һүҙҙәре менән рухи ғазап кисергәнде белдерә. *Күңел әрнеү.* ■ *Нахаҡ туҡмалыуға йәне әрнегән Хөп пөниса урман яңғыратып ҡысҡырҙы.* Я. Хамматов. *Уф тигәндә бөтһөн ине йөрәгем әрнеүҙәре* (Халыҡ йырынан).

**ӘРНЕҮЛЕ** *с. ҡар.* **әрнешле.**

**ӘРНЕШ** *и.* Әрнегән, үртәнгән хис. *Йөрәк әрнеше.*

**ӘРНЕШЕҮ** *ҡ. урт. ҡар.* **әрнеү.** *Хәл бөттө, яурын баштары, беләктәр тоҙға янып әрнешә.* М. Тажи. *Булмаһын һәр хәлдә рәнйеү, үпкә-һәпкә, әрнешеү.* Ш. Бабич.

**ӘРНЕШЛЕ** *с.* Әрнеү кисергән, әрнеү белдергән. *Әрнешле тауыш. Әрнешле һүҙ.*

**ӘРПЕШ** *с.* **1.** Үҙен тотоуҙа, эш башҡарыуҙа йыйнаҡлыҡ, бөхтәлек етешмәгән, тейешле тәртипте, таҙалыҡты һаҡламаған. *Әрпеш кеше. Әрпеш булыу. // Әрпеш тотоноу.* ■ *[Хисмәтулла:] Улар бик әрпеш шул. .. Миңә таҙа кеше кәрәк.* Я. Хамматов. *[Хафиза:] Егеттәрҙең береһе бик йыйнаҡ, икенсеһе .. бер аҙ әрпешерәк.* С. Агиш. *[Балалар — Ринатҡа:] Ҡала мәктәбендә бер ҙә әрпеш булмағанһыңыр әле. Быҫратыу түгел, иҙәнгә сүп тә ҡоймағанһыңдыр.* Ш. Бикҡол.

**2.** Эш рәте белмәгән, булдыҡһыҙ. *[Ғәйшә — Айбикәгә:] Килен, бында комғаныңда һыу бөткән, шуны ла ҡарап ҡуйырға ярамайһың. Ҡуйсы, ҡуйсы. Һиңә әйтһәң дә, әйтмәһәң дә бер. Был тиклем әрпеш булырһың икән.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘРПЕШЛЕК** *и.* Әрпеш кешегә хас сифат. *Әрпешлек күрһәтеү.*

**ӘРПЕШЛӘНЕҮ** *ҡ. һөйл.* Әрпешкә әйләнеү, әрпеш булыу.

**ӘРПӘТҺЕҘ** *с. диал. ҡар.* **әрпеш 1.**

**ӘРСЕГЕС:** **картуф әрсегес** картуф таҙарта торған машина.

**ӘРСЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **әрсеү.** *Әрселгән картуф. Ер ҡарҙан әрселде.*

**ӘРСЕТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **әрсеү.** *Ҡыяр әрсетеү.*

**ӘРСЕҮ** *ҡ.* **1.** Нимәнеңдер ҡабығын юнып, һыҙырып алыу. *Алма әрсеү. Йомортҡаның ҡабығын әрсеү. Йоҡа итеп әрсеү.* ■ *Мине кухняға картуф әрсергә ебәрҙеләр.* Д. Юлтый.

**2.** Ҡаплап, ябып торған, ҡамасаулаған нәмәнән таҙартыу. *Ел иҫеп күкте болоттан әрсене.* ■ *Иртә яҙ ерҙе ҡарҙан әрсей, һалҡын ҡыш йыйған сүп-сарҙы таҙарта.* Т. Сәғитов. *Бабай ағасты ботаҡтарҙан нисек әрсергә кәрәклеген күрһәтеп бирҙе.* Ә. Бикчәнтәев. / Сүп, быҫраҡтан һ. б. таҙартыу, арындырыу. *Ҡырҙа эш бөткәс, мунса инеп, тәнен керҙән әрсеп, .. ауыл халҡы шатлыҡ башланы.* Х. Ғәбитов. *Мылтыҡтарҙы әрсеп булмай көнө-төнө атҡанға* (Бәйеттән).

**3.** *кусм.* Илде, тыуған ерҙе һ. б. кемдәндер азат итеү. *Хәбәрселәрҙең актив үҫеше социализм төҙөлөшөнә арҡыры төшкән зарарлы элементтарҙан әрсеүгә ярҙам итте.* Т. Йәнәби. *Ирек даулап сыҡтың һин донъяға .. таҙартырға ерҙе, саф итергә фашист сүптәренән илде әрсеп.* З. Ҡотип. *Йөрәктәрҙә теләк: дошмандарҙан әрсеү ил йөҙөн.* Р. Ниғмәти.

**4.** *кусм. һөйл.* Алып китеү, урлау. *[Әбей:] Үҙең өйҙә юкта бөтә донъяңды әрсеп китерҙәр әле.* С. Агиш.

**ӘРСЕШЕҮ** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **әрсеү** 1, 3, 4.

**ӘРСӘЛӘНЕҮ** *к. төш. ҡар.* **әрсәләү.** *Бығауланған һинең һөйгән ҡошоң әрсәләнгән яуыз да ыуҙарҙан* (Халыҡ йырынан).

**ӘРСӘЛӘТЕҮ** *к. йөкм. ҡар.* **әрсәләү.**

**ӘРСӘЛӘҮ** *к.* **1.** Кемделер, нимәнелер хәүефтән аралау, ауыр хәлдә ҡалғанда яҡлау. *Айғыр, муйынын дуғаландырып, көтөүҙең арғы осона сапты. .. Көтөүҙән айырылып, ситтәрәк ҡалған колонды әрсәләп, бүреләр менән талаша башланы.* Я. Хамматов. *[Ишмырҙа:] Ул — кеше үлтереүсе, ҡараҡ, бигелый ит. Етмәһә, шул балаңды әрсәләп, гәйебен йәшереп торған булаһың.* Д. Юлтый. *Ҡыҙ айкалаша, кыскыра башлаған арала башҡалары уны әрсәләргә ашыкты, егеткә һөжүм итте.* С. Кулибай.

**2.** Һуғышҡан кешеләрҙе аралау, айырыу. *[Сәмиғулла менән Әхмәҙи] ысынлап тасма-тас һуғыша башланы. Әрсәләп алырға өс-дүрт кеше барып ҡыҫылды.* Ж. Кейекбаев.

**ӘРСӘНКЕ** *с. диал.* Көсһөҙ, сирле.

**ӘРТИЛ** [*рус.* артель] *и. һөйл.* Артель. *Ҡеүәтша [бүрәнә ҡутәргәндә]: Давай, әйҙә! Бер-ике-өс, беҙҙә көс, тип әртилгә ҡеүәт биреп тора.* А. Ғирфанов.

**ӘРТИС** [*рус.* артист] *и. һөйл.* Артист.

**ӘРУАХ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит. күпл.* **1.** *ҡар.* **рух** 1. *[Әсәһе — Нәгимгә:] Иртәгә гәйет бит, бөгөн әруахтар килә торғандыр. Әлхәм уҡып бағышла атайыңа.* В. Солтанов. *Баш осонда әруәх оса нисә-нисә.* Ш. Бабич.

**2.** *кусм.* Үлгән кеше. *«Хәҙрәт, әруахтар рухына берәй аят рәхим итегеҙ»,— тиеү менән, көрьән уҡылды.* М. Ғафури.

**ӘРҺЕҘ** *с.* **1.** Төрлө эшкә, йәшәү шарттарына талымһыҙ булған. *Эшкә әрһеҙ. Әрһеҙ булыу.* ■ *Үҙем дә бәләкәйҙән әрһеҙ үҫтем. Ялланып көнбағыш ҡараным, кубә тарттырҙым, ер тырматтым.* Я. Ҡолмой.— *Миңнулла кеүек әрһеҙ кеше юҡтыр ул! — тиҙәр ауылда Ысынлап та, ул колхоз эшенә лә, ауылдың карт-короларына ярҙамға ла өлгөрә.* Ғ. Дәүләтов. **Эт әрһеҙе** *ҡар.* **эт.** / Ашауға талымһыҙ булған. *Ашауға әрһеҙ кеше. Әрһеҙ мал.* ■ *Бала үҙе лә әрһеҙ булып сыҡҡан. Төрлө әсәнең куҡрәк һөтөн берҙәй яратып ҡабул иткән.* Ф. Рәхимғолова. / Төрлө шарттарҙа үҫә, үрсей алған, ныҡ таралған. *Әрһеҙ гөл. Әрһеҙ суп үләне.* ■ *Биҙәй юлды, өй алдарын әрһеҙ ағас өйәнке.* Ә. Вәли. *Һөйөп әрһеҙ ялан сәскәһен үҙән буйлап яҙғы ел иҫә.* Р. Назаров.

**2.** Оялып, тартынып тороуҙы белмәгән. *Әрһеҙ ҡунаҡ. // Әрһеҙ ҡыланыу.* ■ *[Камилә:] Ҡотолдоҡ бынан тигәйнем, килеп тә етте. Бынан да әрһеҙ кешене күргәнем юк.* Ҡ. Даян. *Дөрөҫ, ҡайһы бер әрһеҙерәк әҙәмдәр саҡырғанды ла көтөп тормай.* М. Кәрим.

**3.** Һаҡлап, ҡәҙерләп тотолмай торған; ҡәҙерһеҙ. *Әрһеҙ кейем. // Әрһеҙгә кейеү. Әрһеҙгә тотоноу.* ■ *Юлға әрһеҙ кейенеп ултырҙым.* Ш. Янбаев. *Булмәлә .. ниндәй ағастан яһалғаны ла билдәһеҙ әрһеҙ өҫтәл [тора].* А. Карнай.

**ӘРҺЕҘЛЕК** *и.* Әрһеҙ кешегә хас сифат. *Ярлы ғаиләлә үҫкән Ғүмәрҙе тормош иркәләмәне, киреһенсә, унан әрһеҙлек талап итте.* М. Дилмөхәмәтов. *Әрһеҙлеккә һеҙҙән өйрәндем мин, ялбыр сәсле һары ҡылғандар.* Ш. Бикҡол.

**ӘРҺЕҘЛӘНЕҮ** *к.* Әрһеҙгә (1, 2 мәғ.) әйләнеү, әрһеҙ булыу. *Гөлкәй апаһына эйәреп йөрөй-йөрөй әрһеҙләнеп ныгынып бөткән.* З. Биишева. *Үҙһенеп етмәйбеҙ Ҡасимды. Ә ул үҙе әрһеҙләнеп, .. беҙгә һыйыныл яткан көнө.* Ф. Иҫәнғолов. *Тәбиғәт кырыҫланған һайын, шофер за әрһеҙләнде, ырҙын табағындамы, элеваторҙамы — һәр ерҙә алға уҙырға тырышты.* Р. Низамов.

**ӘРҺЕҘЛӘҮ** *к.* Һаҡламай, ҡәҙерләмәй әрһеҙ тотоноу, ҡәҙерһеҙләү. *Кейемде әрһеҙләү. Әрһеҙләп кейеү.*

**ӘРҺЕҘЛӘШЕҮ** *к.* Оялып, тартынып тормай, әрһеҙлек күрһәтеү. *Әрһеҙләнеп түргә үтеү.* ■ *Кире яуап алыуына ҡарамаҫтан, егет әрһеҙләшеуен дауам итә.* «Совет Башҡортостаны», 1980, 9 сентябрь.

**ӘРҺӘЛӘНЕҮ** *к. диал.* Ҡарһаланыу. *Әрһәләнеп ашау.*

**ӘРЫҘ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ҡоро ер.

♦ **Ҡөррәи әрыҙ** Ер шары.

**ӘРӘМ** [1] *с.* **1.** Файҙаһыҙға, башҡа киткән, бушҡа сыҡҡан. *Әрәм аҡса. Әрәм көс. // Әрәм ебәреү. Әрәм китеү. Әрәм ятҡырыу. Әрәм үткән ғүмер.* ■ *Күңел яна, көйә ут эсендә йәш ваҡыттар әрәм үткәнгә.* Ш. Бабич. *Иҫкә алам илдең тәүге хәлен, әрәм иҫкән сәхрә елдәрен.* М. Абдуллин.

**2.** *хәб. функцияһында* Кемгә йәки нимәгәлер артыҡ, лайыҡ түгел. *Һиңә һүҙ әрәм.* ■ *«Һин йүнһеҙгә әрәм бит был [төймә]»,— ти батша* (Әкиәттән).

□ **Әрәм булыу** 1) файҙаһыҙға китеү; юғалыу. *Бер генә башаҡ та әрәм булмаһын.* М. Тажи; 2) бәхетһеҙлеккә, күңелһеҙ хәлгә дусар булыу; юҡҡа сығыу. *[Үмәр — Тимербулатҡа:] Яҡшы кешеләр менән китәһең, әрәм булмаҫһың, хуш.* Һ. Дәүләтшина; 3) ваҡытһыҙ үлеү. *Уртансы улдары Миңнегәзиз өсөнсө йыл әрәм булып ҡуйҙы.* Р. Солтангәрәев.. **Әрәм итеү** 1) файҙаһыҙға ебәреү, бушҡа сығарыу; юғалтыу. *Аҡса әрәм итеү. Ваҡыт әрәм итеү.* ■ *[Йәнтимер] кеҫәһенән папиросын алды, кабыҙа алмай, әллә нисә шырпы әрәм итте.* С. Агиш; 2) бәхетһеҙлеккә, күңелһеҙ хәлгә дусар итеү; юҡҡа сығарыу. *Батша: «Егет, башыңды әрәм итмә, һау сағыңда ҡайтып кал",— тигән* (Әкиәттән); 3) ваҡытһыҙ үлемгә еткереү, һәләк итеү. *[Әнйе:] Гел кусеп йөрөү арҡаһында балаларҙы әрәм итеп бөттөк.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘРӘМ** [2]: **әрәм тамаҡ** эшләмәй буш ашап ятҡан кешегә ҡарата әйтелә. *[Саптар:] Өйҙә әрәм та-*

*маҡ булып теләмәйем йәшәргә. Мин аңлайым, хужаҡайым, һәр кем тейеш эшләргә.* Ҡ. Даян. ● *Эшле эш өҫтөндә, әрәм тамаҡ әҙәм өҫтөндә.* Мәҡәл.

**ӘРӘМГӘ** *р.* Файҙаһыҙға, бушҡа. *Әрәмгә китеү. Әрәмгә сығыу.* ■ *Көс китмәне һис тә әрәмгә.* М. Кәрим. *Ғүмерең үтһә әрәмгә, йоҡола күргән төш артыҡ* (Ҡобайырҙан).

**ӘРӘМ-ШӘРӘМ: әрәм-шәрәм булыу** юҡҡа-барға тотолоу; күпләп юҡҡа сығыу; әләф-тәләф булыу. *Әрәм-шәрәм булып бөттө такталар ҙа, теләһәң дә булмай инде өй һалырга.* Ғ. Әмири. **Әрәм-шәрәм итеү** юҡҡа-барға тотоу; күпләп юҡҡа сығарыу; әләф-тәләф итеү. *[Сынбулатов:] Беҙҙә игенде әрәм-шәрәм итеү юҡ.* М. Тажи. *[Сәмига — улына:] Аҡсаңды әрәм-шәрәм итеп, аҡ күмәс ашап йөрөмә.* Х. Ибраһимов.

**ӘРӘМӘ** *и.* Ғәҙәттә туғайҙа, дымлы, уйпат ерҙә үҫкән ваҡ ҡыуаҡлыҡ. *Ҡояш тау артынан ҡалҡынғанда алтынлана йәшел әрәмә.* Ғ. Хәйри. *Йылға аръяғындағы әрәмә эсендә тартайҙар тартылдай.* Т. Йәнәби.

**ӘРӘМӘЛЕК** *и.* Әрәмә үҫкән урын. *[Ҡыҙ] үҙән буйына төшөп, әрәмәлектәге таң һандуғастарына ҡушылып йырҙар йырлай.* С. Ханов. *Беҙҙе ҡотлап йырлай төрлө ҡоштар йәшел әрәмәлек янында.* Ғ. Мәсғүт.

**ӘРӘНДЕК** *и. һөйл.* Көлтә, бесән ташый торған бейек үрәсәле оҙон арба.

**ӘРӘПӘ** *и. һөйл.* Ғәрәфә. *Әрәпә көн.*

**ӘРӘСӘ** *и.* Бер нәмәнең төп мәғәнәһе, асылы. *Мәсьәләнең әрәсәһе.* ■ *Ҡарт эштең әрәсәһенә төшөнөп алғас, был сараны хупланы.* Ж. Кейекбаев. *Эпилог булаһы был прологта, ҡатындың шөбһәле уйҙарынан сығып, әңгәмәнең әрәсәһе әйтеп бирелгән.* Ғ. Хөсәйенов.

**ӘРӘҮӘНЙӘН** *с. ҡар.* **ырауанъян.**

**ӘРӘ-ҺӘРӘ** *и.* **1.** Ҡараңғылы-яҡтылы, күҙ күрер-күрмәҫ ваҡыт. *Таң әрә-һәрәһе.* ■ *Киске әрә-һәрә төшкән.* Ғ. Вәлиев.

**2.** *р. мәг.* Әҙ-мәҙ, һирәк-һаяҡ булып. *Сан араһынан әрә-һәрә генә һыбайҙар күренеп ҡала.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘРӘШӘ** [1] *и.*, **әрәшә себене** *ҡар.* **рәшә** [1].

**ӘРӘШӘ** [2] *и. диал. ҡар.* **тут** [1] 2.

**ӘСАС** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит. ҡар.* **нигеҙ** 4. *Мал әсасына ҡоролмай, бәлки эш һәм ысын семья әсасына ҡоролған был тормош миңә ултырып эшләргә һәм күп уҡырға, тәртипле рәүештә бер хәятта йәшәргә ирек бирҙе.* М. Ғафури.

**ӘСАСИ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Нимәнеңдер нигеҙенә, асылына бәйле. *Әсаси мәсьәлә. Әсаси ҡағиҙә.*

**ӘСАСЛЫ** *с. иҫк. кит.* Әсаси. *Беҙҙең бындай [Йыһанша хәҙрәттеке кеүек] мәҙрәсәләребеҙ әлек замандарҙан бирле була килгән нәмәләрҙер. Бер әсаслы, төплө, ышаныслы шәйҙәр түгелдер.* З. Һаҙыев.

**ӘСАСӘН** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Дөйөм алғанда, нигеҙҙә, ғөмүмән. *Башҡортостан йөмһүриәтенең хужалығы — әсасән ауыл хужалығы.* Т. Йәнәби.

**ӘСБАП** [*ғәр.*] *и.* **1.** Уҡыу-уҡытыу, тәрбиә өсөн кәрәк булған төрлө нәмә. *Күргәҙмә әсбаптары. Уҡыу әсбаптары.* ■ *Класта .. өҫтәл өҫтөндә глобус, ҡара һауыттары, башҡа әсбаптар.* Ғ. Һәйри. / Көндәлек тормошта кәрәк булған төрлө нәмә; кәрәк-яраҡ. *Табылған, нәмәләр бөтәһе лә ҡатын-ҡыҙҙың боронғо биҙәү әсбаптарынан тора ине.* К. Мәргән. *[Зөһрә] юл әсбаптарын бер ергә йыйып әҙерләп ҡуйҙы* М. Ғафури.

**2.** *иҫк. кит.* Эш өсөн кәрәк булған ҡорал-ҡорамалдар. *Йөрөү әсбаптары. Туҡыу әсбаптары.*

**ӘСЕ** I *и.* **1.** Һиҙеү ағзаларына ныҡ тәьҫир итә торған нимәгәлер хас ҡырҡыу тәм йәки еҫ. *Ҡымыҙлыҡ әсеһе. Лимон әсеһе. Тоҙ әсеһе. Әрем әсеһе. Тәтән әсеһе тамаҡҡа ултырҙы.*

**2.** *күсм.* Төрлө шарттар нигеҙендә килеп тыуған ауыр хәл; ҡыйынлыҡ. *Тормош әсәһе.* ■ *Төн урталары ауышҡансы ир көтөп өйҙә яңғыҙ бер үҙең үртәнем ултырыуҙың әсеһен татыған кеше генә беләләр.* Ф. Исәнғолов. *Эш таба алмау әсеһе теңкәгә тейә, йөрәкте һыҙлата.* С. Агиш.

II *с.* **1.** Лимон, мүк еләге, һеркәгә хас тәм булған. *Әсе алма. Әсе балан. Бешмәгән әсе еләк. Әсе ҡатыҡ.* ■ *Мәғфүрә Диләгә .. бер туҫтаҡ әсе эркет ҡуйҙы, йүкә йыуғыс тоттороҙо ла [самауырҙы] ныҡ ышҡып йышырға ҡушты.* Һ. Дәүләтшина. *[Фатима] кәбеҫтә ашына ла күнекте, әсе түгел, тәмле икән.* Б. Бикбай. / Әрем, бороҫҡа хас ауыҙҙы өткөс тәм булған; асы. *Әсе борос. Әсе дарыу. Әсе йыуа. Әсе әрем.* ■ *Беҙ ашаған сохари эремдәрҙән әсерәк* (Бәйеттән). / Тоҙ тәме килгән, тоҙ тәме әйткән. *Был тау тирәләрендә күптәр байҙарға әсе тир сығарып ураҡ урған, бесән сапҡан, һабан һөргән.* Ғ. Минһажев. *Әсе йәштәр, ҡайнар ҡандар тамһын, туҡтаһын әсәләрҙең аһ-зары.* М. Кәрим. / *диал.* Татырлы. *Әсе тупраҡ.* // *Мал әсегә төшкән.*

**2.** Махсус әсетелгән. *Әсе ҡамыр.* ■ *Әсер ҙә инем әсе бал булһа* (Халыҡ йырынан). / Әсе ҡамырҙан бешерелгән. *Әсе икмәк. Әсе ҡабартма.*

**3.** Һиҙеү ағзаларына киҫкен, зәһәрле тәьҫир иткән, ҡырҡыу. *Әсе төтөн.* ■ *[Крәҫтиән] әсе еҫле тәмәке тарта.* С. Агиш.

**4.** Ныҡ һалҡын, киҫкен; үҙәккә үтерлек ҡаты. *Әсе һыуыҡ.* ■ *Әсе ел мине уятты төн урталарында.* Н. Нәжми. *Әсе генә буран, ай һырғаҡ ел, әйләндереп булмай йылҡымды* (Халыҡ йырынан).

**5.** Ҡолаҡ ярырлыҡ нәҙек, үҙәк өҙгөс (тауышҡа ҡарата). *Әсе тауыш.* // *Әсе ҡыскырыу.* ■ *«Әйҙә таралабыҙ»,— тигән тауыштар ҙа ҡолаҡҡа әсе салына ине.* Т. Хәйбуллин. *Самолёттар беҙҙең өҫкә шыҡыйып осҡанда, әсе итеп һыҙғыралар.* Н. Мусин.

**6.** Булыу кимәле көслө булған, ҡаты (ауыртыу, һыҙлауға ҡарата). *Күҙгә ут күренерлек итеп алған әсе тулғаҡтан уның маңлайына шыбыр тирҙәр сыҡты.* Һ. Дәүләтшина. / *күсм.* Бик көслө, ауыр, ҡаты. *Әсе ҡайғы. Әсе михнәт. Әсе хәсрәт.* ■ *Сәгиҙә ҡасандыр өҙөлөп һөйөп, һуңғы ваҡытта шул тиклем әсе хурлыҡ килтереп рәнйеткән балаһын был сәғәттәрҙә йөрәге өҙөлөп йәлләне.* Һ. Дәүләтшина. *Ирҙән айырылмаҡ әсе хәсрәт икәндер — белмәнем.* Ш. Бабич.

**7.** *күсм.* Физик һәм рухи яҡтан ҙур түҙемлек талап иткән, ауыр. *Әсе тормош. Әсе яҙмыш. Әсе һынауҙарҙы үткәреү.* ■ *Көнө-төнө талашыу, тарткылашыу бик әсе нәмә.* М. Ғафури.

**8.** *күсм.* Намыҫҡа тейерлек итеп әйтелгән, уҫал, ағыулы. *Әсе һүҙ.* // *Әсе әйтеү.* ■ *Йәнти-*

*мер .. миңә бик тапкыр, бер әйткәндә биш кат тир сығарырлык әсе һүҙ әҙләй кеүек күренә.* С. Агиш. **Әсе тел** *йәки* **әсе телле** тура һүҙле, яман уҫал кешегә ҡарата әйтелә. *Ғәфү итегеҙ, әфәнделәр, туташтар, мөхтәрәм ғәләмәләр. Беҙ әсе телле. Беҙҙең телдәр һеҙгә ҡарыулаша-ҡарыулаша шулай уҫалланған улар.* Б. Ишемғол. *Кулактар, яҡынлашып килгән үлемдәрен һиҙеп, әсе тешләшә башланылар.* Б. Бикбай.

◆ **Йән әсеһенә** (*йәки* **әсеһе менән**) бик нык өҙәләнеп, бөтә көскә. *Йән әсеһенә ҡысҡырыу. Йән әсеһе менән килтереп һуғыу.*

● *Әсе һүҙгә түҙгән бей булыр, эҫе көнгә түҙгән бай булыр.* Мәҡәл.

**ӘСЕЙ** *и. диал.* Әсәй (өндәшеп әйткәндә ҡулланыла). *[Ғәйзулла:] Әсей, Заһит беҙҙә торһон, йәме.* Я. Хамматов.

**ӘСЕЛЕ** *с.* Әсе (I 1 мәғ.) тәме әйткән, әсе тәме булған. *Көкөрт әселе тимер.*

**ӘСЕЛЕК** *и.* **1.** Нимәләлер әсе мағдәнең, кислотаның булыу миҡдары. *Ашҡаҙандың әселеге.*

**2.** *диал.* Татырлыҡ. *Әселеккә мал ебәреү.*

**ӘСЕЛӘНЕҮ** *ҡ. хим.* Кислород менән реакцияға инеү. *Кислородһыҙ әселәнеү булмай.*

**ӘСЕЛӘҮ** *ҡ.* Әсе (II 1, 2 мәғ.) нәмә теләү. *Һауын бейәләр әселәгән саҡта [әсе] үләндәрҙе эҙләп йөрөп ашай.* М. Ғөбәйҙуллин.

**ӘСЕЛӘШЕҮ** *ҡ. һөйл.* Үҙ-ара асыуланышыу. *[Фәхри — Байназарға:] Ярай, ҡустым, әсәләшеп йөрөмәйек, кисерешәйек бер-беребеҙҙе.* Б. Бикбай. *[Мәсем — Маҡтымһылыуға:] Әйт һүҙең, тартынма, уртаға һалып уйлайыҡ; кәңәшле йыйын тарҡалмаҫ, әселәшмәй уйлайыҡ.* «Ҡара юрға».

**ӘСЕМТӘ** *и. хим.* Берәй химик элементтың кислород менән ҡушылыуынан барлыҡҡа килгән матдә; окисел.

**ӘСЕМӘ** *и. хим.* Урта дәрәжәлә әселәнгән матдә; окись. *Углерод әсемәһе.* **Ҡырҡыу әсемә** юғары дәрәжәлә әселәнгән матдә; перекись. **Сөскөлт әсемә** түбән дәрәжәлә әселәнгән матдә; закись.

**ӘСЕНДЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Кемделер көйөндөрөү, борсоу. *Бөтә донъяла дан алған башҡорт ҡымыҙының хәҙерге ваҡытта бөтөп барыуы мине әсендерә.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 26 ноябрь.

**2.** Кемделер бик ныҡ ҡайғыға һалыу, ғазаплау. *Һуғыш күпме кешенең йөрәген әсендерҙе.*

**ӘСЕНЕҮ** *ҡ.* **1.** Нимәгәлер бик ныҡ көйөнөү, үртәнеү, өҙгәләнеү. *Әсенеп һөйләү.* ■ *Йөрәк әсенә, күңел тулҡынлана, тыуған ауыл күҙ алдына килә.* Д. Юлтый. *Түш менән шыуырға ла булдыра алмауым өсөн үҙемде үҙем өҙгөләрҙәй булып әсенәм.* Ә. Чанышь.

**2.** Кем йәки нимәнелер уйлап борсолоу, кем йәки нимәләр өсөн ҡайғырыу, көйәләнеү. *Әсә улы өсөн әсенеп: — Бар, ят хәҙер, ял ит, исмаһам,— [тине].* Р. Габдрахманов. **Йән әсенеү** кем йәки нимәләр өсөн йән әрнеү, ғазап кисереү. *Һөйгән өсөн [Фәтхелде] .., һәм әсенгән өсөн йәнем, дуҫтар, әсе булыр, бәлки, һүҙҙәрем.* Р. Ниғмәти.

**ӘСЕНЕҮЛЕ** *с. ҡар.* **әсенешле.**

**ӘСЕНЕШ** *и.* Әсенеү, үртәнеү тойғоһо.

**ӘСЕНЕШЛЕ** *с.* Әсенеү (1 мәғ.) тойғоһо белдергән.— *Көндәр буйы ҡаңғырып, яңғыҙым ултырам өйҙә,— тине Луиза әсенешле тауыш менән.* Н. Мусин. *Күпме әрнеүле һүҙ, әсенешле һүҙ .. әйтелде.* Р. Ниғмәти.

**ӘСЕРГӘНЕҮ** *ҡ.* Ныҡ үртәнеп, асыуланыу. *Ҡылысҡайын әсергәнеп һурып алған [Ырғыҙ] ҡындан.* Р. Ғарипов.

**ӘСЕ-СӨСӨ** *и.*, **әсеһе лә сөсөһө лә** *йыйн.* **1.** Тәме әсе һәм сөсө нәмәләр.

**2.** *күсм.* Тормоштағы яҡшы һәм күңелһеҙ хәлдәр. *Донъяның әсе-сөсөһө.* ■ *Шәһит Хоҙайбирҙин империалистик һуғыштың барлыҡ ауырлығын, әсе-сөсөһөн үҙ елкәһендә татыған.* Ғ. Ҡасимов. *[Ғариф:] Суҫҡа малай [Шәрәф], .. донъяны аҙ күргән шул әле, әсене-сөсөнө айырыңҡырап еткермәй.* Б. Бикбай.

**ӘСЕТЕЛЕҮ** *ҡ. төш. ҡар.* **әсетеү** 2, 3.

**ӘСЕТЕҮ** *ҡ.* **1.** Ауыҙ әсе бешкән һымаҡ хис итеү (ғәҙәттә тәме үткер, ҡырҡыу нәмә ҡапҡандан һүң була). *Боростан тел әсетә.* / Асыҡ яраға тоҙ тейгән һымаҡ әрнеп ауыртыу. *Йодтан йәрәхәт әсетә.*

**2.** Әсе тәм индереү, әсегә әйләндереү.

**3.** Ҡур тәьҫирендә органик матдәләрҙе тарҡатып әсе тәме индереү. *Ҡамыр әсетеү. Бал әсетеү. Буҙа әсетеү.* ■ *Оҫолло еңгәнең һыйлы итеп әсеткән, баплап һыуыҡҡан яҡшы ҡымыҙын бер-ике алдыр әсеү менән үк башыңа сыҡ[а].* Ғ. Дәүләтшин.

**ӘСЕТКЕ** *и.* Нимәнелер әсетер өсөн ҡулланылған ҡур (икмәк башы, ойотҡо һ. б.). *Әсетке һалыу. Әсетке яһау.*

**ӘСЕТКЕС** *и. диал.* Әсетке.

**ӘСЕТМӘ** *и. диал.* Әсетке.

**ӘСЕТТЕРЕҮ** *ҡ.* Әсетеү хисен уятыу. *Һарымһаҡ ауыҙҙы әсеттерә.* ■ *Әсе тир тәнде әсеттереп, .. күлдәктәрҙе тәнгә йәбештерҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘСЕҮ** *ҡ.* **1.** Әсе тәм алыу; әсегә әйләнеү, әсе булыу. *Әсегән май.* ■ *Ас көйө һыуһап йөрөгәнсе, әсегән ҡатыҡ айраны әсеп, әсте күптереп йөрөрмөн.* С. Агиш. *Көршәк әсендә әсегән һөт бар.* Д. Юлтый.

**2.** Ҡур тәьҫирендә органик матдәләр тарҡалыу, әсе тәме инеү. *Әсегән бал. Әсегән буҙа.* ■ *Ҡур тейешле норма менән һалынған да, ҡымыҙҙың бөтә төрлөһө туғыҙ сәғәт әсендә әсеп өлгөрҙө.* М. Ғөбәйҙуллин. *[Ҡарт — Зыяға:] Зыя ҡусты, .. балыңды әйтәм, бик шәп әсегән.* Б. Бикбай.

**3.** Ейеп еҫләнеү (эшкәртеү өсөн ейгә һалынған тирегә ҡарата). *Тонсоҡторғос әсегән тире еҫе һиҙелде.* И. Насыри.

◆ **Йән әсеү** *ҡар.* **йән.**

**ӘСЕҮТАШ** *и.* Техникала тире иләү, медицинала дезинфекциялау өсөн ҡулланылған төрлө ҡушар көкөрт әсемәле тоҙҙарҙың (марганецтың, алюминийҙың һ. б.) атамаһы. *Ярағa әсеүташ һөртөү.* ■ *[Хөсәйенов — хәҙрәткә:] Һеҙ каптырған әсеүташ һәм нишатыр, борос менән тоҙ һәм шәкәр менән бал кеүек, татлы тойола.* С. Агиш.

**ӘСЕҺЕРӘҮ** *ҡ.* Әсе аҙыҡ теләү, әселәү. *Әсеһерәгән мал.* ■ *[Ҡатын — иренә:] Буйға ҡалып, әсеһерәп, аш көҫәгәндә ҡоротон ашар, атаһы, айыры тояҡтан бер генә һыйыр булһа ла би-*

*рәйек!"* — *тип, эсәһе зарланған, ти.* «Ҡуңыр боға».

**ЭСИР** [*ғәр.*] *и.* **1.** Яуҙа ҡулға төшкән дошман һалдаты. *Әсирҙәр лагеры.* ■ *Кем өсөн миллион әсирҙәр ут йотоп этләнделәр.* Т. Йәнәби. / *иҫк. кит.* Ҡол. *Йәшәнек бергә-бергә бер табында,.. берәү бер кемгә булманы әсир, ҡол.* М. Ғафури. **Әсир(гә) алыу** (*йәки* **төшөрөү**) *шул уҡ* **әсир итеү** 1. *[Ҡарт — Алпамышаға:] Был фәлән батшаның зинданы, һине һуғышта әсир төшөрөп алып килделәр.* «Алпамыша». **Әсиргә бирелеү** (*йәки* **төшөү**) *кар.* **әсир булыу** 1. *Әсир төшкән фашист һалдаттарын миңә күп күрергә тура килде.* М. Кәрим. **Әсир булыу** 1) яуҙа дошман ҡулына эләгеү. *Егет [иптәшенең] әсир булыуын ишеткәс тә ҡоткарырға ынтылды, ләкин өлгөрә алманы.* Х. Мохтар; 2) бөтә күңелдән ғашиҡ булыу, хайран ҡалыу. *Димдең .. гүзәллегенә, йәмлелегенә әсир булып йөрөүселәр аҙ түгел.* Д. Бүләков. *Һәйкәл тора. Ике аист тора. Китмәй улар, юҡ, юҡ! Һис ҡайҙа! Әсир булған улар баш ҡалама күкрәп сәскә атҡан был яҙҙа.* К. Кинйәбулатова. **Әсир итеү** 1) яуҙа ҡулға төшөрөү (дошман һалдатын). *Абдрахманды нисек тә тереләй әсир итмәксе булған актар.* Ә Вахитов; 2) бөтә күңелде яулап ғашиҡ итеү, хайран ҡалдырыу. *[Баһауҙа] әйтеп аңлата алмаҫлыҡ ниндәйҙер көс бар. Күңелде, бөтә булмышыңды үҙенә тартып ала, әсир итә.* Я. Вәлиев.

**2.** *күсм.* Бөтә күңелдән яратып һоҡланғанды белдерә. *Таныш һандуғас та һайрай һаман, яҙ моңона әсир мин тамам.* С. Кулибай.

**ӘСИРЛЕК** *и.* Әсир хәле. *Әсирлектең бөтә ғазабын үҙ елкәһендә кисерҙе .. Тимербулат.* Ә. Атнабаев. *Әсирлек, ауырһың, сит илдәрҙә тотҡон итеп, йөрәккә ҡан һауҙырҙың* (Халыҡ йырынан).

**ӘСИРЛӘНЕҮ** *к.* Нимәнеңдер тәьҫиренә бирелеү; әҫәрләнеү. *Тәбиғәт ҡосағында әсирләнеп йөрөү. Әсирләнеп йыр тыңлау.*

**ӘСИРЛӘҮ** *к.* Бөтә күңелде яулау, ғашиҡ итеү. *Матурлыҡ әсирләй.*

**ӘСИРӘ** [*ғәр.*] *и.* Тотҡондағы ҡатын-ҡыҙ. *Пәрей бисәһе тигән исем тағылған әсирә мин булам* (Әкиәттән).

**ӘСКЕЛ** *с. кар.* **әскелт.** *Йылы һөт менән әсегән ҡымыҙ тәмһеҙ, әскел була.* М. Ғөбәйҙуллин.

**ӘСКЕЛЛЕ-СӨСКӨЛЛӨ, әскелле лә сөскөллө** *с.* Төрлө-төрлө тәм ҡатнашҡан (ғәҙәттә күңелгә оҡшамаған еҫ, тәмгә ҡарата әйтелә). *Трактирҙың ишеген асыу менән әллә ниндәй әскелле-сөскөллө еҫтәр килеп һуҡлыға.* Ғ. Дәүләтшин.

**ӘСКЕЛТ** *с.* Әсе тәм ҡатнашҡан, әҙ генә әсе тәм йәки еҫ булған. *Әскелт еҫ.* ■ *Иҫергәндәй булдым шунда әскелт сейә тәменән.* А. Баһуманов.

**ӘСКЕЛТЕМ** *с. кар.* **әскелт.** *Әскелтем тәм.* ■ *Ауыл өҫтөндә әскелтем тиҙәк, әрем төтөнө еҫе аңҡый.* Б. Бикбай.

**ӘСКЕЛТЕМ-СӨСКӨЛТӨМ, әскелтем дә сөскөлтөм** *с.* **1.** *кар.* **әскелле-сөскөллө.** *Әскелтем-сөскөлтөм еҫ.*

**2.** *и. мәғ.* Төрлө татлы аш-һыу. *Баярҙың ашағаны май ҙа бал, әскәне әскелтем дә сөскөлтөм, кейгәне төлкө тун да ҡама тун булған.* М. Тажи.

**ӘСМАН** [*фарс.*] *и. кар.* **асман.** *Зәйнәп менән Сәлим юлда яңы бөрөләнгән сәскәләрҙе йыйып, сыр-сыр килеп әсманға күтәрелгән турғайҙарҙы ҡарашып, аталары артынан бармаҡталар ине.* А. Таһиров.

**ӘСМИННИК** [*рус.* осьминник] *и. иҫк.* Дисәтинәнең дүрттән бер өлөшө. *Әсминник ер.* ■ *Өмәселәр яңынан ерҙең буйынан-буйына ыҙанға теҙелде. Күҙ асып йомғанса бер әсминник арышты урып та ташланылар.* М. Кәрим. *[Ташбулат:] Бер әсминник кенә тары сәскәйнем, ҡырау һуҡты.* С. Агиш.

**ӘСМУХА** [*рус.* осьмушка] *и. иҫк.* Ҡаҙаҡтың һигеҙҙән бер өлөшө. *Бер әсмуха сәй. Әсмуха шәкәр.* ■ *Салих .. һары ҡағыҙҙан бер әсмуха тәмәке һыйырлыҡ ҡап яһай.* Х. Мохтар.

**ӘСМУХАЛАУ** *к. иҫк.* Әсмуха иҫәбенә һалыу. *Әсмухалап һатыу.*

**ӘСМӘЙЕЛ** *с. кар.* **асмәйел.**

**ӘСРАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Сер. *Латиф, алһыу күгең дә [таң] ниндәй сикһеҙ ниндәй ҙур?! Унда илһам, унда әсрар, унда рәхмәт, унда нур!* Б. Мирзанов. **Әсрар баян ҡылыу** сер һөйләү. *Ҡурай хәлен китаптарҙан уҡып ҡара — нисә төрлө әсрар баян ҡылмыш имде.* С. Яҡшығолов.

**ӘССӘЛӘМӘҒӘЛӘЙКҮМ** [*ғәр.*] *өнд.* Осрашҡанда һаулыҡ һорап әйтелә. *Тупһаны атлап өйгә инеү менән егет: «Әссәләмәғәләйкүм!» — тип сәләм биргән* (Әкиәттән).

**ӘСТАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Яҙыу юлы. *Инде күрһәттем бугай был тәмсилемдең әстарын.* Ш. Бабич.

**ӘСТЕЯТЛЫ** *к. диал.* Мәғәнәле. *Һөйләгән һәр һүҙе әстеятлы.*

**ӘСТЕЯТҺЫҘ** *с. диал.* Мәғәнәһеҙ.

**ӘСТРИ** *и. һөйл.* Австрий.

**ӘСТӘҒИН** *ымл. һөйл.* Әстәғәфирулла.

**ӘСТӘҒӘФИРУЛЛА** [*ғәр.*] *ымл.* **1.** «Хоҙай үҙе һаҡлаһын» тигән мәғәнәлә аллаға һыйынғанды белдерә *[Саттар ҡарт:] Әстәғәфирулла, әстәғәфирулла, көфөр һүҙҙән алла һаҡлаһын,— тип уҡына.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Нимәгәлер аптырап ҡалғанды, ғәжәпләнгәнде белдерә. *[Әбей:] Был тиклем дә ҡупшы йөрөрһөң икән, әстәғәфирулла, тефү, күҙ теймәһән үҙеңә.* Т. Хәйбуллин. *[Хужа ҡатын:] Әстәғәфирулла,.. буламы һуң? Яҙмағанды һөйләйһең. Етемдәр улар [миңә] үҙ балаларым кеүек күренә.* С. Агиш.

**ӘСТӘКӘТ** *с. диал.* Мәскәй, оңкот.

**ӘСХӘБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Тәғлимәтте дауам итеүсе. *Әсхәбтәр беҙгә һалып киткән эҙ бар, һеҙҙәрҙә ярма булһа, беҙҙә тоҙ бар.* Аҡмулла.

♦ **Әсхәбе ҡәһәф** дини экиәттәге мәмерйәлә йәшәп белем йыйған ете кеше менән бер эт.

**ӘСӘ** *и.* **1.** Балалы ҡатын (үҙ балаһына ҡарата). *Әсә ниндәй яҡын! Әсәйемдән эс серемде йәшерә алманым.* Ғ. Сәләм. / Балалы һәр ҡатын. *Бала өсөн генә үтә түҫлө әсә ғүмере.* М. Харис. **Ҡиәмәтлек** (*йәки* **морондоҡ**) **әсә** ситтән төшкән килен аралашып йөрөр өсөн бүләк биреп, әсәй итеп яһап алған кешеһе. **Үгәй әсә** үҙ әсәһе үлгәндән һуң атаһы алған ҡатын. **Үкел** (*йәки* **эхирәтлек**) **әсә** *диал. кар.* **морондоҡ әсә.**

**2.** *күсм.* Ярҙам табырҙай, һыйынырҙай иң изге урынға ҡарата әйтелә. *Урал, Урал — әсә ул һыуын эскән батырға.* «Ҡараһакал».

♦ **Әсә һөтө** *ҡар.* **һөт.**

● *Үгәй әсә ураҙа тоттора, ашатһа ла ҡоҫтора.* Әйтем.

**ӘСӘД** [*ғәр.*] *и.* Иҫке ҡояш календарында июль айы.

♦ **Әсәд нәжүме** 1) Арыҫлан *(йондоҙлоҡ исеме);* 2) июль айы. *[Батырша:] Хоҙай бойорһа, әсәд нәжүменең өсө көнөндә башларһығыҙ.* F. Ибраһимов.

**ӘСӘЙ** *и.* **1.** Баланың әсәһенә өндәшеү һүҙе. *Хуш бул, әсәй! Ташлап киттем һине. Ғүмер көнөм һиндә тулды инде.* F. Амантай. **Өлкән әсәй** бер нисә ҡатынлы ғаиләлә йәш ҡатын балалары өсөн ҡатындарҙың олоһо *[Хаят:] Өлкән әсәй, мин дә һаҡал һалайым әле, ҡайҙа минең һаҡалым?* Һ. Дәүләтшина. **Бәләкәй әсәй** бер нисә ҡатынлы ғаиләлә: оло ҡатын балалары өсөн ҡатындарҙың йәше.

**2.** *ҡар.* **әсә** 1.

**ӘСӘК** *ымл.* Ҡурҡып ҡапыл тертләгәнде, биленләгәнде белдерә. *Әсәк! Ҡотомдо алдың.*

**ӘСӘКӘЙ**[1] *и. ирк. ҡар.* **әсәй** 1. *Күп тормамын, әсәкәй, түреңдә* (Сеңләүҙән).

**ӘСӘКӘЙ**[2]**: әсәкәй алыу** *диал.* сикәнес алыу.

**ӘСӘЛЕК** *и.* Әсә (1 мәғ.) хоҡуғы.

**ӘСӘЛЕ-ҠЫҘЛЫ** *р.* Әсә менән ҡыҙ икеһе бергә. *Әсәле-ҡыҙлы эшләү.*

**ӘСӘЛЕ-УЛЛЫ** *р.* Әсә менән ул икеһе бергә. *Әсәле-уллы бесән сабалар.*

**ӘСӘЛӘШ** *с. һөйл.* Әсәһе бер, аталары башҡа булған (әсә яғынан бер туғандарға ҡарата). *Әсәләш ағай. Әсәләш ҡусты.*

**ӘСӘҺЕ** *өнд.* Ирҙең ҡатынына өндәшеү һүҙе. *[Хәйретдин:] Әсәһе, самауырыңды ҡуяһыңмы әллә?* Я. Хамматов.

**ӘҪМАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Емеш. *Мәғариф бағылыр ул, унда гөлзар, атып сәскә бирер ул татлы әҫмар.* С. Яҡшығолов.

**ӘҪПЕ** *и.* Килешмәгән бер нәмә ашаған йәки эскәндән тәнгә ҡыҙарып сыҡҡан сабыртҡы. *Әҫпе ҡалҡыу.*

♦ **Ҡара әҫпе** *диал. ҡар.* **сәсәк** 1.

**ӘҪПЕЛӘҮ** *ҡ.* Әҫпе ҡалҡыу. *Әҫпеләп китеү.*

**ӘҪТӘ** *и. иҫк.* Яҡтылыҡ өсөн яндырылған сыраларҙы ҡуя торған, өс тағандан ғибәрәт ҡулайлама.

**ӘҪӘР**[1] [*ғәр.*] *и.* Тел өлкәһенә, әҙәбиәткә, әҙәбиәт ғилеменә ҡараған ижади эш. *Сәсмә әҫәр. Теҙмә әҫәр. Фольклор әҫәре. Ҙур күләмдәге әҫәр. Тарихи әҫәр. Яҙыусының әҫәре.* ■ *Юғары художестволы әҫәр — ул күп ҡырлы аҫыл таш кеүек. Уның ҡайһы яғына яҡтылыҡ төшөрһәң, шул ҡыры нур балҡытып уйнап китә.* М. Минһажетдинов. *Һәр синыф вәкиле бары үҙ синыфы файҙаһына хеҙмәт иткән әҫәрҙе генә халыҡ араһына тарат[ҡан].* F. Амантай. / Төрлө сәнғәт өлкәһенә ҡараған ижади эш. *Музыкаль әҫәр. Сәхнә әҫәре.* ■ *Салауат Юлаев һәйкәле — Сосланбек ағаның иң ҙур, иң гүзәл әҫәре.* «Башҡортостан ҡыҙы», 1971, № 1.

**ӘҪӘР**[2] [*ғәр.*] *и.* **1.** Нимәгәлер хас һыҙат, уның күрһәткесе, сағылышы; эҙ, билдә. *Йән әҫәре күренмәй.* ■ *[Сәгиҙә] шунда уҡ түшәгенә ауып, юрғанын башынан аша ҡапланы, ләкин күҙенә йоҡо әҫәре килмәне.* М. Тажи.

**2.** *һөйл.* Тәьҫир, йоғонто. *Көн буйы юғалып йөрөгән өсөн атай ҙа, әсәй ҙә орошa торған булһалар ҙа, был орошоуҙар зәһәрле, йөрәк әрнетә торған әҫәр ҡалдырмай торғайны.* М. Ғафури.

□ **Әҫәр итеү** йоғонто яһау. *Әсә-атаңды ая, балаҡайым, тип ни ҡәҙәре ялынһалар ҙа, Маянһылыуға бер төрлө лә әҫәр итмәне.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». **Әҫәр йыйыу** йоғонто алыу, тәьҫирләнеү. *Инсаниәт шәжәрәһенән йыйып әҫәр, милләткә тулыһынса күрһәт хеҙмәт* С. Яҡшығолов.

**ӘҪӘРЛӘНДЕРЕҮ** *ҡ.* Нимә менәндер тәьҫир итеп хисләндереү. *Уҡый-яҙа белмәгәндәрҙе китап .. айырыуса бер көс менән әҫәрләндергән.* Ә. Харисов. *Батыршаның хаты .. зар иларлыҡ һәм ғибрәт алырлыҡ, әҫәрләндергес әҫәр.* Ф.Хөсәйенов. / Тулҡынландырыу, йөрәкһетеү.

**ӘҪӘРЛӘНЕҮ** *ҡ.* Нимәнеңдер тәьҫиренән хискә бирелеү, хисләнеү. *Матур, моңло, дәртле тауыштарҙы ишеткәндә йәштәр ҙә, ҡарттар ҙа әҫәрләнмәй ҡала алмайҙар.* М. Ғафури. *Мәхмүт боронғо замандарҙа мәмерйәләрҙә йәшәгән кешеләр тарафынан яһалған һүрәттәр тураһында ниндәйҙер журналға яҙылған бер мәҡәләне уҡығас, бик әҫәрләнгәйне.* Ф. Лоҡманов. / Хискә бирелеп тулҡынланыу, йөрәкһеү *[Егет] һағынып, әҫәрләнеп тыуған яғына ҡайтып төштө.* F. Аллаяров. *Аҡыл әйтә: «Ташла, әҫәрләнмә, үтте инде иҫәр көндәрең».* В. Әхмәҙиев.

**ӘТЕР-АЛАМА** *с. диал.* Йолҡош *[Байбисә:] Бынау әтер-аламаларҙы әйтем, ҡорсаңғылар, бала-сүрәһе менән килеп һыйып тороуҙары етмәй, бай балаһын ҡағалар.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘТЕҮ** [*рус.* а то] *һөйл.* **1.** *терк.* Юҡһа, юғиһә. *[Розалия:] Ебәр, әтеү ҡысҡырам.* Р. Низамов. *Сания .. көрәгеп миңә һона.— Мә, әтеү ҡалала һөйәгең ҡатып бөткәндер.* Н. Мусин.

**2.** *инш.* Улайһа. *Әтеү, беҙ эшләй торайыҡ.* ■ *[Зилә:] Ялған дуҫлыҡ, ялған һөйөүҙең исеме нисек, әтеү.* Ә. Вахитов.

**3.** *мөн. ҡар.* **әлбиттә** 1.— *Аҡылың бар икән!* — *Әтеү һуң.* ■ *Ваҡ колхоздар — ваҡ йылға ул. Әгәр бергә ҡушһаң унауын — бер совхоз бит.— Яҡшы аҡыл! — Әтеү.* Б. Бикбай.

**ӘТЕҮСӘ** *терк. диал. ҡар.* **әтеү.**

**ӘТЛЕК** *и.* Күк ҡыңғырау сәскәле үлән һәм уның һары төҫтәге йыуан тамыры (ҡытлыҡта тамырын ашағандар). *Тәмле нәмә ул әтлек тигәне — киптерһәң, шәкәр кеүек, сәйнәгәндә кетерләп тора, һап-һары үҙе.* Ә. Чаныш. *Әле иҫемдә күреп һоҡланғаным, әтлек атҡан сакта күк сәскә.* Х. Ғәбитов.

**ӘТМӘ**[1] *и.* Ҡаҙ, өйрәк аяғындағы яры. *Зәйнулла ҡарттың ҡарсығы өйрәктең тамға ҡуйылған әтмәләрен [күрһәтте].* С. Ҡудаш.

**ӘТМӘ**[2] *и. диал. ҡар.* **йәтмә**[1]. *Әтмә короу.*

**ӘТМӘ**[3] *и. диал. ҡар.* **йәтмә**[2]. *Йылым әтмәһе. Әтмәле йылым.*

**ӘТМӘКӘЙ** *и.* Тауҙа үҫә торған ваҡ ҡына йомро ҡыяҡлы сөсө йыуа. *Күк үләнгә күмелә түмәләстәр, сыҡты микән әле әтмәкәй?* Х. Назаров.

**ӘТМӘКӘС** *и. ҡар.* **әтмәкәй.**

**ӘТМӘЛӘНЕҮ** *ҡ. төш. ҡар* **әтмәләү** 1. *Әтмәләнгән нәмә.* ■ *— Әйҙәгеҙ әле, егеттәр, һуп иттек! Сәхиулла ағай .. һуйын көптө ҡутәртеү өсөн әтмәләнгән арҡанды тотоп торорға ҡушты.* Й. Солтанов.

**ӘТМӘЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **әтмәләү** 1. *Ҡыуыш әтмәләтеү.* ■ *Ҡайнатаһы ситтә йөрөгән арала ҡейәүе бына ошо барак, складтарҙы ҡағып-һуғып әтмәләтеп алды.* Х. Мохтар.

**ӘТМӘЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Унан-бынан ҡораштырып, еңелсә генә ойоштороп нимәлер эшләү, яһау. *Ҡабыҡтан ғына әтмәләгән иҫке арбала Ғәләмшә менән улы Әхмәтдин ултыра.* С. Агиш. *Әҙһәм ҡарттың ҡабыҡтан яһаған ҡыуышы бар. Уның эсендә әтмәләп һике һымаҡ бер нәмә эшләнгән.* Ж. Кейекбаев. / Арлы-бирле, унан-бынан ғына йүнәтеү. *Шәрәфи олатай дегәнәк һабағы йолҡоп, ситәндең һүтелгән ерен әтмәләп йөрөй.* Б. Бикбай. / Уйлап сығарылған, ысында булмаған эш-хәлгә ҡарата әйтелә. *Райкомдан .. редакцияға яуап та әтмәләгәндәр — йәнәһе, мәҡәләне колхоздағы хәлде белмәгән кеше яҙған.* З. Хисмәтуллин.

**2.** Ауыр хәлдән ҡотолоу юлын эҙләү сараһын йүнләү. *«Ҡалай итеп булһа ла, әтмәләп ҡыш сығырға кәрәк ине»,— тине [атайым].* Д. Юлтый.

**ӘТМӘЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ. ҡар.* **әтмәләү** 1. *Аласыҡ әтмәләштереү.*

**ӘТНӘКӘ** [*рус.* однако] *терк. һөйл.* **1.** Ләкин. *[Аллабирҙе:] Министр итеп ҡуйырлыҡ кеше, әтнәкә бер малайын аҡылға ултырта алмай.* Ш. Бикҡол.

**2.** *и. мәғ.* Берәй эш-хәлдең күҙгә ташланмаған нескәлектәре, хикмәтле яҡтары. *Хужалыҡ иҫәбенең әтнәкәләрен белмәгән, шуның арҡаһында ярамаған эштәр эшләгән кешеләр аҙмы ни?* Ш. Насыров. *[Әлхамов:] Ҡунаҡтарҙы тыуған көнөңә ҡарап саҡырырға кәрәк. Бының был әтнәкәһе бар: ҡатын-ҡыҙға бүләк яғы мулыраҡ эләгә.* С. Кулибай.

**ӘТРАФ** [*ғәр.*] *и. кит.* Тирә-яҡ, урата. *Әтрафҡа билдәле булыу.* ■ *[Зариф:] Аллаһы тәғәләнең күҙрәте киң, Бикморҙа ағай. Әтрафыбыҙ тыныс булһа, тамаҡ та туҡ булыр.* Н. Ҡәрип. **Әтрафы шәтта** *иҫк.* төрлө яҡ. *Ҡыпсаҡ таифәһенең сәләмәт ҡалғандары әтрафы шәттаға таралған.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ӘТРАФЛЫ** *р. иҫк. кит.* Һәр яҡтан, ентекләп. *Комиссия былар‌ҙың һәр икеһен әтрафлы тикшереп,.. бөтө Башҡортостанды ете кантонға бүлергә ҡарар ҡылынды.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**ӘТРӘГӘЛӘМ** *и.* Тотороҡло эше, йәшәр урыны булмай илдән илгә йөрөгән ярлы кеше. *[Гәрәй — Сәгиткә:] Былтыр бит һинең турала, диненән сыҡҡан икән, тип гөж килделәр. Илдән биҙҙе, әтрәгәләм булды, тинеләр.* А. Таһиров. / Әрләп әйтелә. *Бөтмәҫ бында разный әтрәгәләм,— тине [Заһитҡа] ҡарлыҡҡан ҡалын тауышлы кеше.* В. Исхаҡов.

**ӘТТӘ, ай әттә, әттәгенәһе** *ымл.* Аптырағанды, үртәнгәнде, үкенгәнде белдерә. *[Ҡарт:] Бер яҙыу бар ине. Ай әттәгенәһе, шыпа иҫтән сығып ҡуйған шул.* М. Тажи.

**ӘТ-ТӘ-ТӘ** *ымл.* Нимәгәлер иҫ китеп, ғәжәпләнеп торғанды белдерә. *[Әбей:] Әт-тә-тә!.. Харап килешә икән үҙенә сабата менән аҡ ойоҡ.* М. Тажи. *[Ҡотлоғужин:] Бүләк күлдәк 478 һум ғына тора. [Камилә:] Әт-тә-тә... Ниңә бер уға [Мәликәгә] шул тиклем ҡиммәтле. Беҙгә бер нәмә лә юҡтыр әле.* Д. Исламов.

**ӘТӘЛ** *ымл.* Уйын барышында уйындан сыҡҡанды белдереп әйтелә.

♦ **Әтәлгә ҡалыу** ҡыйын хәлгә юлығып, сараһыҙ булыу. *Ямғыр ҡатыш көслө ел сыҡһа, был әтәлгә ҡалған юлаусыға ҡайын булды ҡыуыш-ҡыйыҡса.* С. Кулибай. **Әтәл араһына бәтәл** кәрәкмәгән саҡта ҡыҫылған кешегә ҡарата әйтелә.

**ӘТӘЛГЕ** *и.* Инә шоңҡар. *Уйға сумған саф Ағиҙел өҫтөнән ҡанаттарын шыйылдатып бер әтәлге осоп үтте.* Ш. Шәһәр. *Әтәлге ҡош маҡтанһа, күлдән һыуһар типтем, тир* (Ҡобайырҙан).

**ӘТӘМБӘЙ** *и.* **1.** Һарыҡ, кәзәнең көҙ тыуған бәрәсе; көҙләүес, бүлтерек. / *күсм.* Буйға бәләкәй, кәгез кешегә әйтелә.

**2.** Сәсмәй үҫкән тыу ашлыҡ. *Ыҙан буйына әтәмбәй үҫкән. // Әтәмбәй арыш. Әтәмбәй һоло.*

**3.** *күсм. кәмһ.* Ситтән күсеп килеп ултырған кеше; килмешәк. *[Ғилаждың уландары — Сөнәгәткә:] Килмешәк! Һиңә айғыр әле! Ерең юҡ бит һинең, әтәмбәй!* Ж. Кейекбаев.

● *Яҙын иген икмәгән әтәмбәйгә моң булыр.* Әйтем.

**ӘТӘС** *и.* **1.** Тауыҡтар ғаиләһенә ингән оҙон дуға ҡойроҡло, ҙур ҡыҙыл кикрекле, типке тырнаҡлы ата енесле ҡош; тауыҡтың ата енеслеһе. *Әтес кикреге.* ■ *Ана бер әтәс әллә нимә тапҡан да, «көрк-көрк» тип, тауыҡтар саҡыра.* Ғ. Дәүләтшин. *Ҡыҙыл кикрек, бөҙрә ҡойроҡ — әтәстәре ҡупшы бик, ҡукрәк киреп, маҡтанышып ҡысҡыралар: «Кикирикук!»* Ф. Рәхимғолова. **Таң әтәсе** иртә таңда ҡысҡырған әтәс. *Таң әтәстәре ҡысҡыра, әллә таң ата микән* (Халыҡ йырынан). **Тәүге әтәс** таңға ҡаршы беренсе булып ҡысҡырған әтәс. *Тәүге әтәс ҡысҡырғанға тиклем һуҙылған йыйылыш тамамланғас та, Михаил, йәш дуҫын эйәртеп урамға сыҡты.* Я. Хамматов.

**2.** *күсм.* Юҡ ҡына сәбәптән ҡыҙып барған, һуғышырға әҙер торған кешегә әйтелә.

♦ **Көҙгө әтәс** *мыҫҡ.* көс-ғәйрәтен күрһәтеп, шәп булып ҡыланған кешегә ҡарата әйтелә. *Килгәс тә, ҡарт уҡытыусылар‌ҙың күбеһе менән Булаттың борсағы быҡмай, көҙгө әтәс тип ҡарайҙар уға.* Ә. Вахитов. *[Наил:] Һеҙҙе нимә эшләтергә инде? Көҙгө әтәстәрме ни — талашырға ғына тораһығыҙ.* Ш. Бикҡол. **Ҡыҙыл әтәс** үрт, янғын. **Ҡыҙыл әтәс ҡундырыу** (*йәки* **ебәреү, осороу**) *йәки* **ҡыҙыл әтәстән ялатыу** ут төртөп яндырыу, үртәү. *Беҙ ҡапсыҡта ятмай тиҙәр — быны төлкө шәп белә, һәм ул ферма лапаҫына ҡыҙыл әтәс ебәрә.* Х. Кәрим. *Элекке йыл һуң байҙар‌ҙың күпме мөлкәтен ҡыҙыл әтәстән ялаттыҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘТӘСЛӘНЕҮ** *ҡ. һөйл.* Ғәйрәтләнеп, кәпрәйеп, кешегә ташланырға тороу. *Зилский менән секретарь, ауыл буйынса үҙҙәренең инәһе кешеләренә инеп .., әтәсләнеп, кеше ҡурҡытып, түрәлекте*

*күрһәтеп сыҡтылар.* Ғ. Дәүләтшин. *[Юнир:] Телен тешләгән, бая бик әтәсләнгән була ине.* Ш. Бикҡол.

**ӘҮ** *ымл.* Кеше өндәшкәндә яуап итеп әйтелә. *[Сәгиҙә — Тәнзиләгә:] Әү, инәй! Миңә әйтәһеңме?* М. Тажи.

**ӘҮҘЕМ** *с.* **1.** Ынғай, ихлас күңелле. *Әүҙем кеше.* // *Әүҙем эшләү. Ҡушҡанға әүҙем йөрөү.* ■ *В. Мортазин уға [Ғ. Сөләймәновҡа]: — Өфөгә кил, ҡурайсы артист булырһың,— ти, ләкин район ойошмалары эшкә әүҙем комсомолецты ебәрергә теләмәй.* Р. Шәкүров. *Данлайһың һин һолло, таҫыл егеттәрҙе, һөнәрмән һәм эшкә әүҙем ил ҡыҙҙарын.* А. Игебаев.

**2.** Үҙ-ара бер теләктә булған; берҙәм. *Эшкә әүҙем халыҡ.* // *Эшкә әүҙем тотоноу.* ■ *Йәй буйына һыйыр һауҙы ҡыҙҙар. Тәүҙә ауыр булыр кеүек ине. Әүҙем тотонғас, бирешмәнеләр.* М. Хәйҙәров. *Ниңә һуң .. һәр кешенең хыялындағы яҡты бәхет өсөн әүҙем генә көрәшмәҫкә.* Ғ. Ибраһимов.

**ӘҮҘЕМЛЕК** *и.* Үҙ-ара килешеп эшләү теләге, берҙәмлек. *Әүҙемлектә ҡаҙаҡтарға тиңләшерлек халыҡ, ихтимал, юҡтыр ҙа.* Ғ. Ибраһимов. *Нәүәр .. бер мәктәп коллективында әүҙемлек булмауы тураһында һөйләне.* Ә. Гәрәев.

**ӘҮҘЕРЕҮ** *к. һөйл.* Кемделер үҙенә ҡаратыу, үҙе яҡлы итеү. *Үҙ яғына әүҙереү. Барыһын үҙенә әүҙереп алған.*

**ӘҮҘӘЙ** *и. диал.* Урман.

**ӘҮЕЛЙЕҮ**: **йоҡоға әүелйеү** *диал.* йоҡоға талыу, йоҡомһорау. *[Һурәт] ҡарап ята торғас, бер аҙ йоҡоға ла әүелйей башлағанмын.* С. Кулибай.

**ӘҮЕМБӘК** *и.* Йәшел башлы бәләкәй ала өйрәк.

**ӘҮЕН**[1] [*рус.* овин] *и.* Һуғыр алдынан көлтәле игенде киптерә торған ҡоролма. *Ямғыр яуыпнитеп ебәрһә, әүенгә һалыныр тип, Ваһап ҡарт көлтәгә бәйләргә ҡушты.* Ж. Кейекбаев. *Хисбулла, ямғыр серетеп бөтөп барған ҡарабойҙайҙы әүенгә һалып елләтеп булмаҫмы, тип .. баҫыуға китте.* З. Биишева.

◆ **Әүен баҙы** иген киптергәндә ут яғыр өсөн әүен аҫтына ҡаҙған тәрән соҡор. **Әүен һуғыуы** әүендә киптерелгән ашлыҡты һуғыу. *Был ҡышты мин үҙебеҙҙә үткәреп, ауыл байҙарына көнлөкләп утын-бесән ташып, әүен һуғып үткәрҙем.* Ғ. Минһажев. **Әүене янғандай** бик борсолоп, хафаланып йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә. *Нисә күрмә сырайы гәмһеҙ, йөҙө, әүене янғандай, йомоҡ, томһа була торғайны уның.* Ғ. Лоҡманов.

**ӘҮЕН**[2] *и. ҡар.* **нәүем.**

**ӘҮЕНЛӘҮ** *к.* Көлтәләге игенде әүен аҫтына тағанлап өйөү. *Әүенләп һалыу.*

**ӘҮЕР** *и. иҫк.* Ҡулдың яурынға тоташҡан урыны; ҡулбаш, иңбаш.

**ӘҮЕРЕЛДЕРЕҮ** *к.* **1.** Ғәмәлдәге хәлен үҙгәртеп икенсе сифат, башҡа төҫ биреү, башҡаға әйләндереү. *Илебеҙҙең бер нисә районында, шул иҫәптән Башҡортостанда ла, мышыларҙы әйләштереп, йорт хайуандарына әүерелдереү буйынса тәжрибә үткәрелә.* «Совет Башҡортостаны», 1980, 14 сентябрь.

**2.** *миф.* Сихри көс менән бер нәмәне йәки кешене икенсе нәмә, кеше итеп үҙгәртеү. *[Ҡыҙ — егеткә:] Беҙҙең әсәйебеҙ бик мәкерле: ул мине быжыр, бөкрө ҡыҙға әүерелдерер, уртансы апайымды урта йәштәрҙә яһар, ә иң өлкән апайымды бөтәбеҙҙән дә һылыу итер. Алдана күрмә* (Әкиәттән).

**ӘҮЕРЕЛЕҮ** *к.* **1.** Ғәмәлдәге хәле үҙгәреп икенсе сифат, башҡа төҫ алыу, башҡаға әйләнеү. *Артабан ваҡыт үтеү менән эзбиз ләме — эзбизташҡа һәм мәрмәргә, балсыҡ — балсыҡташҡа һәм һәүерташҡа, ҡом — ҡомташҡа һәм кварцитҡа, торф күмергә, антрацитҡа һәм графитҡа әүерелгән.* Д. Бураҡаев. / Ниндәйҙер икенсе бер нәмә булып сығыу, булып китеү. *Был шайтан кеүек ике ҡатын Мәрйәмде бик тиҙ алдап, .. бер-ике көндә тамам уның әсәһе булып әүерелделәр.* М. Ғафури. *Буранбай телдән төшмәне, шул көндоң геройы булып әүерелде.* Д. Юлтый.

**2.** *миф.* Сихри көс ярҙамында бер нәмә йәки кеше икенсе бер нәмә, кеше булып үҙгәреү. *Шүлгәндең турһыҡтан бер ҡалаҡ ҡанды алып йотоуы булды — айыуға әүерелеүе булды, ти* (Әкиәттән).

**ӘҮЕРЕЛТЕҮ** *к. ҡар.* **әүерелдереү**. *Мәскәйҙе ҡыҙға әүерелтеү. Һыуҙы боҫҡа әүерелтеү.*

**ӘҮЕРЕҪЛЕК** *и. диал.* Әүеҫлек.

**ӘҮЕРЕҮ** *к.* **1.** *ҡар.* **әүерелдереү 1.** *Ғәлим төнөн көнгә әүереп эш эшләне.* К. Туйкин.

**2.** *кусм.* Кешенең күңелен кем йәки нимәгәләр ауҙарыу, ҡаратыу. *Кешене үҙеңә әүереү.*

**ӘҮЕРКӘ** [*рус.* оборка] *и. диал.* Ҡатмар. *Күлдәккә әүеркә һалыу.*

**ӘҮЕРКӘЛЕ** *с. диал.* Ҡатмарлы. *Әүеркәле күлдәк.*

**ӘҮЕРМӘК** *и. һөйл.* Кеше күңелен тартҡан ҡыҙыҡ күренеш, тамаша.

**ӘҮЕРМӘЛЕ** *с. һөйл.* Ынғайға килгән, тыңлаулы. *Былай, һөйләшкәндә Алһыу әүермәле генә күренде уға, әүрәтеп булыр һымаҡ.* Ғ. Ибраһимов.

**ӘҮЕРМӘН** *и.* **1.** Сифатын үҙгәртеп төрлө ҡиәфәткә инә, әүерелә алған мифик зат; шайтан.

**2.** Үҙенең ысын йөҙөн йәшереү өсөн эш алымын үҙгәрткән кеше.

**ӘҮЕРНӘ** *и.* **1.** Бер-береһенә тәре рәүешендә арҡыры ҡуйып нығытылған ике ағас (төрлө маҡсатта ҡулланыла). *Әүернә яһау. Бураны әүернәгә ултыртыу.*

**2.** Кәләпле епте урау, йомғаҡлау өсөн ҡулланылған тәре рәүешендәге ҡуш тар таҡтанан ғибәрәт ҡулайлама. *Нәсимә әүернәнән тырпысаға еп урап ултыра.* М. Ғафури. *Әй, ул ептәр! Буй-буй булып улар солғай ине кәләп ағасын. Әүернәһен — өйҙөң каруселен уйлап тапҡан әҙәм балаһы.* Н. Нәжми. **Әүернә ағасы** (*йәки* **төбө**) әүернәне һала торған өстаған.

**3.** Урғыс машинаның әйләнеп торған ҡанаты. *Ураҡ күңелле итеп келтерәй. Әүернә таҡталарына леп-леп итеп эре башаҡтар бәрелә.* Р. Ғабдрахманов. *Комбайнер .. машинаның алдына*

*сыкты, әүернә канатын түбән төшөрөп, сукәйеп ултырҙы.* Ә. Вәли.

**4.** Өҫтө-өҫтөнә арҡыс-торҡос һалып өйгән көлтә.

♦ **Әүернә сәскә** таж япраҡтары ҡара-ҡаршы урынлашҡан сәскә. **Әүернә сәскәләләр** *бот.* дүрт таж япрағы әүернә кеүек ҡара-ҡаршы урынлашҡан үҫемлектәр ғаиләһе.

**ӘҮЕРНӘЛӘҮ** *ҡ.* Әүернә (1 мәғ.) рәүешле итеү. *Күн куртка тәнен ыҫпай итеп ҡыҫып тора. Уның өҫтөнән әүернәләп ҡайыш артылған.* Б. Хәсән.

**ӘҮЕРӘ** *с. диал.* Ауара. *[Гөлйөҙөм:] Хат яҙмаһын. Кеше ҡулына төшөр ҙә, әллә ни һөйләрҙәр. Үҙе ситкә китеп барғанда минең башымды әүерәгә һалмаһын.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘҮЕҪЛЕК** *и.* Бесән һалыр өсөн кәртә алдына эшләнгән лапаҡ япма; лапаҫ. *Туры атҡа әүеҫлектән бесән төшөрөп һалдым.* Д. Юлтый. *Ваһап карт .. әүеҫлек башында йоҡлап ятҡан уландарын уятты.* Ж. Кейекбаев.

**ӘҮЕҮ** *ҡ. һөйл.* **1.** Бер яҡҡа ҡыйшайыу, шыуышыу; ауышыу. *Лапаҫ урам яҡҡа әүеп ултыра.*

**2.** *күсм.* Бер тарафтан икенсе тарафҡа, бер кешенән икенсе кешегә күсеү.

**ӘҮЕШЕҮ** *ҡ. һөйл.* Ҡуҙғалып, ҡыйшайып, ситкә шыуыуы. *Кәбән башы әүешкән.*

**ӘҮЕШТЕРЕҮ** *ҡ. һөйл.* Ҡуҙғатып, урындан күсереү. *Уттың утындарын әүештереү.*

**ӘҮЕШ-ТӘҮЕШ** *р.* Нисек етте шулай, арлы-бирле генә. *[Хәсән] әүеш-тәүеш терәтеп ҡуйған йорт-ҡаралты менән донъя көттө.* М. Хәйҙәров. *Әүеш-тәүеш кенә эшләнгән кәртә ҡапҡа.* Р. Шәкүр.

♦ **Әүеш-тәүеш итеү** 1) нимәнелер бер урындан икенсе урынға һалыу, күсереү. *Һөттө әүеш-тәүеш итеп күнәкте бушатыу. Нәмәләрҙе әүеш-тәүеш итеп өйҙө йыйыштырыу;* 2) бер нәмәне икенсеһенә алмаштырыу, алыш-биреш менән шөғөлләнеү. *Тиресе Әхмәҙи .. әүеш-тәүеш итеп тапҡан аҡсаһына .. сепаратор һатып алырға булды.* Ж. Кейекбаев; 3) йүнен табып унан-бынан ҡораштырыу. *Ҡайһы бер колхозсылар, әүеш-тәүеш итеп, емерелгән мейестәрҙең кирбестәрен өйө һалып, усаҡ һымаҡ нәмә сығарғандар.* Ж. Кейекбаев. **Әүеш-тәүеш килеү** бер урында тапаныу. **Әүеш-тәүеш килтереү** 1) нимәнелер урынынан күсереү, теләһә нисек ҡуйыу. *Китаптарҙы әүеш-тәүеш килтереп бутап бөткән;* 2) *кар.* **әүеш-тәүеш итеү** 2. *Йорт-ҡураһын әүеш-тәүеш килтерә торғас, бөтөнләй бер нәмәһеҙ ҡалды.*

**ӘҮКӘЙ** *өнд.* Тиңдәш ҡыҙҙарҙың бер-береһенә өндәшеү һүҙе.

**ӘҮҠАТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Ваҡыт. *Бер ҙә әүҡатым юҡ.*

**ӘҮКӘТ** [*ғәр.*] *и. диал.* Көс, хәл. *Әүкәттән тайыу.*

**ӘҮЛИӘ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Дини ҡарашса изге кеше, изге йән. *Тауҙың дәл түбәһенә әллә ни замандарҙан бирле ниндәйҙер бер әүлиә эйәләшкән дә, нисәмә йөҙ йылдарҙан бирле шунда йәшәп килә.* Ғ. Дәүләтшин. *[Булат:] Әүлиә бит ул беҙҙең Ғәлиә апай. Әйтмәй ҡара, барыбер белә.* К. Кинйәбулатова.

**2.** *күсм.* Изге күңелле, яҡшы кеше. *Торғаны бер әүлиә. // Ул бит бер әүлиә кеше, һәр кемгә ҡулынан килгән ярҙамды итер, ә буләк-маҙар аслан алмаҫ.* Б. Бикбай.

**ӘҮЛӘ** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* Артыҡ, яҡшыраҡ. *[Рәхмәт:] Башҡорт байҙарына хеҙмәтсе булып йөрөгәнсе, хәйерселәп йөрөгәнең әүлә.* Ж. Кейекбаев.

**ӘҮЛӘД** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Балалар. *Ҡайта алмаһаҡ, доға ҡылың, әүләдтәрем* (Бәйеттән).

**ӘҮМӘКЛӘҮ** *ҡ. һөйл.* Устан-усҡа күсереп бер тегеләй, бер былай әйләндереү. *Ҡамыр әүмәкләү. Ҡурмасты уста әүмәкләү.*

**ӘҮМӘКЛӘШЕҮ** *ҡ.* Көрмәкләшеп аунау. *Әхтәм урядникка ташланып, уны тәпәләй башлай, ҡысҡырышып ерҙә әүмәкләшәләр.* Х. Ибраһимов.

**ӘҮМӘЛӘ** *и.* Ҡаймаҡты талғын ғына ҡайнатып, он йәки манныйҙан бешергән бутҡа.

**ӘҮМӘЛӘНЕҮ** *төш. ҡар.* **әүмәләү.** *Ашыҡ-бошоҡ әүмәләнгән май.*

**ӘҮМӘЛӘТЕҮ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **әүмәләү.**

**ӘҮМӘЛӘҮ** *ҡ.* **1.** Йомшаҡ нәмәне сәпән йәки төрлөсә әйләндергеләп баҫып, йомарлау. *Ҡамырҙы әүмәләү.*

**2.** Еренә еткермәй арлы-бирле генә эшләү (быйма, кейеҙ кеүек нәмәгә ҡарата). *Быйманы әүмәләп кенә биргәндәр, баҫыуы етмәгән.*

**ӘҮМӘЛӘШТЕРЕҮ** *ҡ.* **1.** Саҡ-саҡ, еңелсә генә әүмәләү.

**2.** *һөйл.* Ҡораштырыу. *Берәй иҫке-моҫҡоно боҙғанда, шуларҙан әүмәләштереп, Хәлкәйгә ҡулмәк һымаҡ нәмә тегеп кейҙерә торғайнылар.* Д. Юлтый.

**ӘҮРӘ** *и.* Урман эсендәге аҡлан. *Әүрә бесәне.*

**ӘҮРӘК** *и. диал. ҡар.* **әүрәү** [2].

**ӘҮРӘТЕҮ** *ҡ.* **1.** Нимә менәндер ҡыҙыҡтырып, күңелен арбап үҙенә ҡаратыу, ылыҡтырыу. *[Эткол:] Мин уны әүрәтеп ҡараным, ҡунаҡҡа саҡырып ҡараным, .. балымды эсмәй сығып киткән булды бит, йолҡош.* Ғ. Дәүләтшин. *«Һүҙ кеше әүрәтер өсөн түгел, йән аҙығы өсөн кәрәк»,— ти торғайны Мөхәмәтулла.* Ә. Вахитов. / Нимә менәндер үҙенә тартыу, йәлеп итеү, мауыҡтырыу. *[Үмәр:] Бына ышан көҙгө көнгә. Әҙәмде әүрәтеп ҡайһылай йылы торған булды. Иртәгә ҡар яумаҫ тимә.* Ш. Янбаев. *Осраған бер утта ҡыҙыныу юҡ һәм әүрәтмәй инде һәр йылтыр.* Р. Бикбаев.

**2.** Ауыр хәлдәге кешене йыуатыу. *Кейәүе Айбикәнең бойогоп барғанын күргәс, тағы әүрәтергә, мәрәкә һүҙҙәр менән күңелен ауларға тырышты.* Һ. Дәүләтшина. *[Хисмәтулла] әсәһенең яурынынан һөйә-һөйә әүрәтте: «Юҡҡа ҡурҡаһың, әсәй. Ҡуркма, мин тиҙ ҡайтырмын».* Я. Хамматов. / Илаған, мыжыған баланы тынысландырыу өсөн йыуатыу; алдаштырыу. *Баланы әүрәтеү. Әүрәтеп йоҡлатыу.* ■ *Апайымдар мине бәүеткәндәр, әүрәткәндәр.* Р. Бикбаев.

**ӘҮРӘҮ** [1] *ҡ.* **1.** Кем йәки нимә менәндер мауығыу, уға бөтә күңел менән бирелеү. *Уйынға әүрәү. Һүҙгә әүрәү.* ■ *«Әһә, был ҡыҙ хәҙер инде миңә әүрәй башлаған икән»,— тип ҡыуана торғайнык.* Т. Йәнәби. *Балыҡ та ифрат күп ҡапты. Шуға әүрәп, һаман ултыра бирәм ҡул буйын-*

*да.* Д. Буракаев. *Кыҙ ҙа һылыу булғанға.., Шулғән әүрәп, мауығып, бай һарайға йотолған, бөтә эше онотолған.* «Урал батыр». / Нимәгәлер мауығып онотолоу. *Ғәйзулла төрлө хистәргә әүрәп килә торғас, әрәмәлеккә нисек барып еткәнен һиҙмәй ҙә калды.* Я. Хамматов. *Хафаланам: үтте микән бары шуклык менән әүрәп үт вакыт?* Р. Бикбаев.

**2.** Кем йәки нәмә менәндер йыуаныу, уға албырғау. *Балаларға әүрәп йәшәү. Бала уйынсыкка әүрәп йоклап китте.*

**ӘҮРӘҮ**[2] *и.* Иген елгәргәндә төшкән вак кый. *Рафик бер ус башак өҙөп алды, уларҙы иплән кенә ыуҙы, әүрәүен өрҙө лә борсактай йоп-йомро кыҙғылт бөртөктәргә караны.* Ә. Вахитов. *Алыҫтарак әүрәү саңдары боркотоп,* «Коммунар» *комбайндары йөрөй.* Ғ. Ибраһимов.

♦ **Әүрәү ашаған һыйыр һымак** ауыр тын алып, бых итеп ултырған кешегә карата әйтелә.

**ӘҮРӘШЕҮ** *к. һөйл.* Бер-беренә әүрәп яратышыу.

**ӘҮСАФ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Тасуир.

**2.** Сифат, үҙенсәлек. *Көн һайын ак кукрәгем керҙәр бирә, һәр шәятин әүсафы ягылып кына.* Ш. Бабич.

□ **Әүсаф кылыу** һүрәтләү, тасуир итеү. *Әгәр йәннәт менән тамукты әүсаф кылырга йәмге булһа, каф та каф.* М. Ғафури.

**ӘҮҮӘЛ** [*ғәр.*] *р. иҫк. кит.* **1.** *кар.* **тәүҙә 1.** *Осрашыр тип уйланым кул менән әүүәл кулың.* Ш. Бабич.

**2.** Әлек, әүәл. *Закон булған: әүүәл алла, батша. .. Кайҙа барма, унда каргыш, зар.* С. Кулибай.

♦ **Әүәл кисе** иҫкесә 1 февраль. *Әүүәл кисе аяҙ — бик һуң килер яҙ.* (Һынамыштан).

**ӘҮҺЕЛДӘК** *и. диал.* Бәүелсәк, сәңгелдәк.

**ӘҮҺӘЛӘК** *и.* Бәүелеп уйнар өсөн токанлап тағылған аркан; бәүелсәк, сәңгелдәк. *Әүһәләк эйеү.*

**ӘҮҺӘЛӘҮ** *к. һөйл.* **1.** *кар.* **әүәләү.** *Балсыкты әүһәләү.*

**2.** Тәләһә нисек йөрөтөп кәҙерһеҙләү; ойпалау. *Өр-яңы костюмын әүһәләп бөткән.*

**ӘҮШӘЛӘҮ** *к. һөйл.* Аҙыкты тел менән төрлөсә әйләндергеләп вaклау; әүәләү. *Икмәкте әүшәләп йотоу.*

**ӘҮӘЙ** *ымл.* Баланы йоклатканда көйләп әйтелә.

□ **Әүәй булыу** *бал.* йоклау.

**ӘҮӘКЛӘҮ** *к. диал.* Үсекләү, үсектереү.

**ӘҮӘЛ**[1] [*ғәр.*] *р.* **1.** Тәү башлап; тәүҙә, башта. *Кем күтәрер калын пәрҙәләрҙе үҙем әүәл барып тотмаһам?* М. Ғафури. / Нимәнәндер алда, элек. *Мин хат яҙам, барып етһен тимен, гәйбәттәрҙән әүәл намыҫым.* Х. Ғиләжев.

**2.** Үткән заманда; элек, борон.— *Әүәл,— тибеҙ, булһа әгәр дәүер йырак.* М. Уразаев. *Әүәл заманда бер ауылда бер карт менән карсык йәшәгән, ти* (Әкиәттән).

**3.** *с. мәғ.* Булып үткән, элекке. *[Акйегет — Зөбәржәткә:] Әүәл төндә төшөмдә, бер төйләгән күк күгәрсенде инде типтем тигәндә генә, уяныл киттем.* М. Кәрим.

● *Әүәл яфа күрмәй, һуңынан вафа килмәй.* Мәкәл.

**ӘҮӘЛ**[2] [*ғәр.*] *и.* Нимәнеңдер тәүге, баш өлөшө; баш. *Бисмиллә тип башланым һәр бер эштең әүәлен* (Бәйеттән).

**ӘҮӘЛГЕ** *с.* **1.** Элек булған, баштағы; элекке. *Мин Разия апайҙың сырайында йылмайыу ишараһы күрҙем, ләкин йылмайыу билдәһен шундук тағы ла әүәлге моңһоулык, хәсрәт күмеп китте.* Н. Мусин. *Гөлсибәр бик нык үҙгәргән, картайған, ләкин, әүәлгегә карағанда, етеҙ, еңел хәрәкәтле күренә.* С. Агиш.

**2.** Бик күптәнге; элекке, боронғо. *Әүәлге заман. Әүәлге йылдар.* ■ *Салауат батыр токомдары аргымактарын эйәрләнеләр, әүәлге яуҙар утында сыныккан кылыстарын кулына алдылар.* Р. Ниғмәти. *Хәйҙәр менән Хатип әүәлге дуҫтар инде улар.* Ф. Иҫәнғолов.

**ӘҮӘЛДӘН** *р.* **1.** Үткән замандан, бик күптән; электән. *Малайҙарҙың баҙар көн баҫыу капкаһын һаклауы — әүәлдән килгән нәмә.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Алдан ук, элгәре. *Әүәлдән әҙерләнгән нәмәләрҙе рәтләп һалдык.* М. Ғафури. *Әйтерһең, әүәлдән әҙерләнеп, ошоно ғына көтөп торғандар — береһен-береһе уҙҙырып исем атау эшенә керештеләр.* С. Агиш.

**ӘҮӘЛЕ** [*ғәр.*] *р. кар.* **әүәл**[1]. *[Әбей:] Кайҙа ул әүәле беҙгә йырлап ултырыу. Йәшләй тотоп кейәүгә бирҙеләр.* В. Әхмәҙиев.

**ӘҮӘЛӘНЕҮ** *к. төш. кар.* **әүәләү.** *Әүәләнгән балсык.*

**ӘҮӘЛӘТЕҮ** *к. йөкм. кар.* **әүәләү.** *Камырҙы онга әүәләтеү.*

**ӘҮӘЛӘҮ** *к.* **1.** Баҫкылап, сәпәп йомарлау, билдәле бер рәүешкә килтереү. *Балсыкты икмәк һаған шикелле кул менән әүәләп, йомгаклай башланылар.* Ш. Янбаев. *Һөнәрсе .. балсыктан, комдан әүәләп, сәй эсә торган касалар һаһай икән.* З. Биишева. *Ябағанан әүәләп һаған туп менән уйнайбыҙ.* И. Абдуллин.

**2.** Берәй онтак нәмә өҫтөндә төрлөсә әйләндергеләп, тәгәрәтеп йомарлау. *Камырҙы онга әүәләү. Котлетты шөкәрә онтағына әүәләү.*

**3.** Аҙыкты ауыҙҙа тел менән тегеләй-былай йөрөтөп иҙгеләү (ғәҙәттә тешһеҙ кешеләргә карата әйтелә). *Хәйерлебанат йомшак коймакты тешһеҙ урттары менән ашыға-ашыға әүәләй ҙә, күҙен йомоп, муйынын һуҙып, йотоп ебәрә.* З. Ғәлимов.

**4.** *кусм.* Өҫтән-мөҫтән генә, нисек етте шулай эшләү; һупалау. «*Сик пионерҙары*» *шиғыры ышандырырлык булып сыкмаған, художество яғынан эшләнмәгән, ашык-бошок әүәләп ташланған.* Р. Ниғмәти. *Госпиталдә ятканда бер шиғырҙар китабы әүәләнем.* М. Кәрим.

**ӘҮӘЛӘШЕҮ** *к. урт. кар.* **әүәләү 1, 2.** *Балсык әүәләшеү. Котлет әүәләшеү.*

**ӘҮӘҪ** [*ғәр.*] *с.* Берәй эштә эшләүгә теләге ҙур булған, уны мауығып башкарған; ихлас. *Уйын-көлкөгә әүәҫ. Һүҙгә әүәҫ кеше.* // *Әүәҫ эшләү. Әүәҫ укыу.* ■ *Ниғмәт.. фәлсәфә һатырга әүәҫ, бер касан да тумһайып йөрөгәнен күрмәҫһең.* К. Аралбаев. *Комсомолец Рәүеф Туктаров үҙенең тәжрибәһен иптәштәре менән*

әүәҫ уртаҡлаша. Ф. Иҫәнғолов. *Ҡустым әүәҫ шаярырға, бытылдап һүҙе бөтмәй.* А. Игебаев.

□ **Әүәҫ булыу** нимәгәлер ихласлыҡ күрһәтәү. *Миңнегәле .. нимәгәлер бәләкәйҙән әүәҫ булды шул тимер-томорға.* Р. Солтангәрәев. **Әүәҫ итеү** нимәнелер яратҡан бер шөғөл итеү. *Үйынды әүәҫ итеп алыу.*

**ӘҮӘҪЛЕК** *и.* Берәй эш менән ысын күңелдән мауыҡҡанлыҡты, уға булған теләкте ҡурһәткән сифат; ихласлыҡ. *Белемгә әүәҫлек. Йырға, бейеүгә әүәҫлек. Уҡыуға әүәҫлек.* ■ *Яҙыусыларға хас .. әүәҫлек бар унда [следователь Ғәлләмовта] — тикшереү ваҡытында күргән-белгәнен ул бик ентекләп яҙа бара.* Х. Зарипов. *Беренсе спектакль беҙҙә театр уйнауға әүәҫлек уятты.* Б. Бикбай.

**ӘҮӘҪЛӘНЕҮ** *ҡ.* Ниндәйҙер эшкә бирелеү, мауығып уға ынтылып тороу; ихласланыу. *Әптерәй менән инде баягылай әүәҫләнеп эшләй алманыҡ.* Й. Солтанов. *Ҡышын мәкенән балыҡ тоторға мин яңыраҡ әүәҫләндем.* Ф. Иҙәнғолов.

**ӘФИСӘР** [*рус.* офицер ⟨ *нем.*] *и. һөйл.* Офицер. *Әфисәрҙәр ҡысҡырғанда һалдат тора ҡалтырап* (Бәйеттән).

**ӘФЙУН** [*ғәр.* ⟨ *лат.* ⟨ *гр.*] *и.* **1.** Өлгөрөп етмәгән мәктән һығып алып киптерелгән, көслө наркотик һаналған һут (айырым төр дарыуҙар эшләгәндә ҡулланыла). *Әфйун тартыу.* ■ *Һатып бирә ишан әфйундарын да.* М. Ғафури.

**2.** Ысын барлыҡты дөрөҫ аңлауға ҡамасаулаған, аҡылды, аңды томалаған нәмә. *Рәсул булһаң ишан, әфйун урынына гилем, әхлаҡ өләш.* Ш. Бабич.

**ӘФЙУНСЫ** *и.* Әфйун тартыусы.

**ӘФКАР** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Фекерҙәр. *Уларҙа милли әфкар булған ул саҡ. Курерһең, рус тәуарихтарына баҡ.* С. Яҡшығолов.

**ӘФЛИСУН** [*рус.* апельсин ⟨ *гол.*] *и.* **1.** Цитрус үҫемлектәргә ҡараған оҙонсараҡ япраҡлы мәңге йәшел көньяҡ ағасы. *Әфлисун үҫтереү.* ■ *Әфлисун да менән әй бер лимон япраҡ яра микән көҙҙән һуң* (Халыҡ йырынан).

**2.** Шул ағастың түңәрәк йәки оҙонсараҡ формалағы ҡыҙғылт һары ҡалын ҡабыҡлы, ваҡ бүлкәттәрҙән торған һутлы емеше. *Ҡытайский әфлисундар килә тиҙәр йәшниктә* (Халыҡ йырынан).

**ӘФЛӘС** [*ғәр.*] *с. иҫк.* Тормошҡа апмаҫ. *Ул минең әфләс хыялым.* Ш. Бабич.

**ӘФТИӘК** [*фарс.*] *и. дини* Ҡөрьәндең бәләкәй генә китап рәүешендә төпләнгән етенән бер өлөшө. *Әфтиәк уҡыу.* ■ *Йән тәрбиәһе — көрьән, әфтиәк ятлауҙан ғибәрәт булған дини мәктәп .. минең алты йыл ғүмеремде һәләк итте.* Б. Ишемғол.

**ӘФӘНДЕ** *и. иҫк.* Синфи йәмғиәттәге өҫтөн ҡатлам кешеһе һәм шундай кешегә ололап өндәшеү һүҙе. *[Айбулат — Ныязғолға:] Миңә бына ситтән килгән ҡунаҡ әфәнделәр менән һөйләшеп ҡалырға кәрәк.* Һ. Дәүләтшина. *[Мостафа:] Мәрйәмдең пианино уйнауын һорайыҡ, әфәнделәр.* Д. Юлтый.

**ӘХИ** [*ғәр.*] *и. һөйл.* Яҡын, дуҫ кешегә өндәшеү һүҙе.

**ӘХИРӘТ** [1] [*ғәр.*] *и. дини* Үлгән кешенең йәне бара торған донъя; теге донъя. *[Мулла:] Донъя мәшәкәте бөтмәҫ инде ул, Ырыҫкол. Әхирәтте онотмаҫҡа кәрәк. Беҙ әхирәт өсөн йәшәйбеҙ.* Б. Бикбай. *Уйнар ҙа инем, көлөр инем, әхирәттә ҡаты һорау бар* (Халыҡ йырынан). **Әхирәт көнө** теге донъяға киткән көн.

● *Донъя эшен әхирәткә ҡалдырма.* Әйтем.

**ӘХИРӘТ** [2] [*ғәр.*] *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың мәңгелеккә вәғәҙәләшеп, бүләк бирешкән дуҫы. *Әхирәт булышыу.* ■ *Гөлйөҙөм әхирәтен ныҡытып ҡосаҡлай.* Һ. Дәүләтшина. *Уларҙың [Ирйегет менән Бураншаның] ҡатындары әхирәт ине. Байрам да, кәсеп тә бергә ине уларҙың.* З. Биишева.

**ӘХИРӘТЛЕК** [1] *и. ҡар.* **әхирәт** [1]. *[Йәнбикә — Фәриҙәгә:] Һи, донъя эше тип тамам шашҡанһың, .. әхирәтлекте лә уйларға кәрәк.* Ф. Иҫәнғолов.

**ӘХИРӘТЛЕК** [2] *с. диал. ҡар.* **морондоҡ** [3]. *Әхирәтлек әсәй.* ■ *[Ғәффә:] Һинең әсәйеңде мин беләмен, әхирәтлек ҡыҙ бит мин уға, һәр көн һайын икәү йөрөр инек, ҡарағатҡа шишмә буйына.* С. Кулибай.

**ӘХИРӘТЛӘШЕҮ** *ҡ.* Әхирәт булышыу. *Әхирәтләшеп, бүләк бирешеү.* ■ *Аш мәжлестәренән [Мәғдән менән мин] бер-беребеҙҙе ҡалдырған юҡ инде ул. Байрам һайын йә уларҙа, йә беҙҙә. Шуның арҡаһында ҡатындар ҙа әхирәтләшеп бөттө.* М. Кәримов.

**ӘХКӘМ** [*ғәр.*] *и.* **1.** *иҫк. кит.* Закон, ҡарар. *Әлхасил, башҡа мосолмандар кеүек, ҡаҙаҡтар ҙа әхкәмде бик яҡшы беләләр.* М. Ғафури. *Тыныр бер көн шәриғәт, донъяуи әхкәм, закондар ҙа, уларҙың хөкөмө аҫтында иҙелгән бәндә — ҡолдар ҙа.* Б. Мирзанов.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ӘХЛАҠ** [*ғәр.*] *и.* **1.** Кешеләрҙең бер-береһенә һәм йәмғиәткә ҡарата мөнәсәбәтен билдергән тәртип принциптары һәм нормалары. *А. С. Пушкин шулай уҡ башҡорт халҡының да тарихын, тормошон, әхлағын өйрәнде.* Ә. Усманов. *Минең фамилиям — Бесәншин. Араҡы эсмәйем, тәмәке тартмайым, ҡатын-ҡыҙ алдында тыйнаҡлымын. Ҡыҫҡаһы, әхлағым таҙа.* С. Кулибай.

**2.** Кешенең ҡылығында, холҡонда сағылған тәртибен, тәрбиәһен күрһәткән сифат. *Йәш заманда бик кәрәкле яҡшы әхлаҡ, бигерәк тә, әй брадәр, булма ахмаҡ!* М. Ғафури.

**ӘХЛАҠИ** [*ғәр.*] *с.* Әхлаҡҡа мөнәсәбәтле. *Әхлаҡи ҡараш. Әхлаҡи яҡтан ҡылыҡһырлау.*

**ӘХЛАҠЛЫ** *с.* Яҡшы холоҡло; тәрбиәле. *Матур йөҙлө кеше күп ваҡытта әхлаҡлы була.* М. Ғафури.

**ӘХЛАҠҺЫҘ** *с.* Боҙоҡ, насар холоҡло; тәрбиәһеҙ. *Әхлаҡһыҙ кеше.*

**ӘХЛАҠҺЫҘЛЫҠ** *и.* Әхлаҡ (1 мәғ.) принциптарын, нормаларын тотмаған хәл. *[Хөрмәт:] Билдәле булыуынса, ололарҙың тупаҫлығы, эрләшеүе баланы әҙәпһеҙлеккә, әхлаҡһыҙлыҡҡа өйрәтә.* Я. Вәлиев.

**ӘХМӘР** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Ҡыҙыл (төҫкә ҡарата).

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ӘХРАС** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* Алдаҡсы. *Ул минең әфләс хыялым, күркәм әхрас иблисем.* Ш. Бабич.

**ӘХСӘН** [*гәр.*] *с. кит.* **1.** Бик яҡшы. *Нисә баш һалмая инсан, уның өсөн булдылар әхсән фәкире һәм гәни солтан.* М. Өмөтбаев.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

**ӘХУАН** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Туған, дуҫ. *Вә ләкин тирә-ягымда уянмыш бер нисә әхуан, тиәләр бәне ҡыҙғаныпт: «Уян, Сафуан! Уян, уян!»* С. Яҡшығолов.

**ӘХҮӘЛ** [*гәр.*] *и. кар.* **хәл** [1] 2. *Ул арала сабып Кусимов килеп етте. Үҙем белгәнсә, уга был тирәләге әхүәлде һөйләнем.* С. Әлибаев. *Беҙ киләйек Ҡараколөмбәт әхүәленә.* «Бабсаҡ менән Күсәк». **Әхүәле рухиә** уй-фекер торошо; рухи хәл. *Мин шәкерттәрҙең әхүәле рухиәләре менән танышып, Буби менән көрәштем.* М. Ғафури.

**ӘҺАЛИ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* Бер ерҙә йәшәгән халыҡ. *Кәрәк башҡорт, кәрәк башҡалар булһын, Башкортостанда торган әһалиҙың хазинага бирә торган доходтары бик аҙ ине.* М. Һаҙыев.

**ӘҺЕЛ** [*гәр.*] *и. кит.* **1.** Кешеләр, халыҡ. *Хәҙрәт һөйләнгән арала мәжлес әһеле тагы ла берҙе эсеп алды.* И. Насыри.

**2.** Ниндәйҙер эш-шөғөлгә мөнәсәбәтле кеше. *Дин әһеле. Фән әһеле. Әҙәбиәт әһеле.* ■ *Бер нисә минуттан директор кабинетына заводтың бөтә әһелдәре йыйылды.* З. Хисмәтуллин. *[Зәйнулла батрак:] Эште нимәнән башлар икән хөкүмәт әһелдәре?* М. Кәримов.

**ӘҺЕЛДӘҮ** *к. кар.* **ыһылдау.** *Әһелдәп төшөү.*

**ӘҺЕМ** *ымл.* Көтмәгәндә берәй ҡыуаныс булғанды белдерә; әһемкәс. *Әһем, бер китапты таптым!*

**ӘҺЕМКӘС** *ымл. кар.* **әһем.**— *Әһемкәс, ун биш тин. Ҡыя сапкан.* Һ. Дәүләтшина.

**ӘҺЕНДӘЙ** *с. диал.* Уҫлаптай. *Әһендәй ирҙәр.*

**ӘҺЛЕ** *и. кит.* Күмәк кешене, халыҡты белдерә. **Әһле ғилем** ғилем эйәләре, уҡымышлы кешеләре. **Әһле ислам** ислам динендәге халыҡ. *[Мулла:] Үҙебеҙҙең файҙабыҙ өсөн булган манифесты әһле ислам хата аңлап, боҙоҡ эштәргә файҙаланыу мөмкин тип аңламаһын.* Һ. Дәүләтшина. **Әһле ҡәләм** *шул уҡ* **ҡәләм эйәһе** (*кар.* **ҡәләм** 2). *Һәр төрлө һүҙ яҙҙы был көндө әһле ҡәләм.* М. Ғафури.

**ӘҺРАМ** [*гәр.*] *и. иҫк.* Дүрт ҡырлы нигеҙҙән сығып, ослайып барып бөткән, эре таштан һалынған боронғо Египет кәшәнәһе; пирамида.

**ӘҺӘ** *ымл.* **1.** Бер эш-хәлдең булыуынан ҡәнәғәт булғанды белдерә (ғәҙәттә кем йәки нимәгәлер үсәү рәүешендә әйтелә). — *Әһә, эләктеңме яуыз бесәй! Тондорам хәҙер башыңа!* Я. Вәлиев. *[Дейеү:] Әҙәм еҫе сыга, әһә!.. Әҙләп йөрөргә түгел, ул үҙе килгән икән. Сыҡ әйҙә!* (Әкиәттән). / Нимәнеңдер булыуына шатланғанды, ҡыуанғанды белдерә. *Әһә, бына таяҡтар, өҫтәлемә аяҡтар!* Ә. Вахитова.— *Әһә, ҡар яуган икән!* С. Агиш.

**2.** Нимәнелер ҡапыл ғына һиҙеп, аңлап алғанды, төшөнгәнде белдерә. *Әһә, һиҙҙек эшеңде, һин тиктәҫкә йөрөмәйһең икән.* Т. Йәнәби. *[Байрамгол:] Әһә, аңлашылды. Колхозсыларҙың һине юкка гына һаран Юлтый тимәй икән.* Н. Хафизов. *Әһә, үҙебеҙҙең тамыр — ҡыпсаҡ икән!* Б. Бикбай.

**ӘҺӘМИӘТ** [*гәр.*] *и.* **1.** Нимәнеңдер тормошта тотҡан урыны, ижтимағи баһаһы. *Мәсьәләнең әһәмиәте. Эштең әһәмиәте. Әһәмиәткә эйә булыу. Әһәмиәт тотоу.* ■ *Ораторҙар метр системаһындагы улсәүҙәргә күсеүҙең әһәмиәте тураһында [һөйләне].* С. Агиш. *Бөгөнгө башҡорт поэзияһының үҫешендә традицияларҙың әһәмиәтен билдәләү гәйәт мөһим бер мәсьәлә ул.* Ә. Хәкимов.

**2.** Нимәнеңдер кәрәклеге, мөһимлеге; файҙалы, урынлы булыуы. *Ғәфү итегеҙ, минең был һөйләгәндәрҙең һеҙҙең өсөн, бәлки, бер төрлө лә ҡыҙыгы ла, әһәмиәте лә юктыр.* М. Тажи. **Әһәмиәт биреү** (*йәки* **итеү**) иғтибарға лайыҡ тип һанау, иғтибар итеү. *[Гөлнур Сәгиҙә] хакында ундай-бындай фекер йөрөтмәне, уга әллә ни әһәмиәт биреп караганы юк ине.* М. Тажи. *Тышҡы киәфәтем менән мин һиңә әһәмиәт итеп бөтмәһәм дә, йөрәгем менән бик ныҡ әһәмиәт итәм, тик ул һиңә һиҙелмәй генә.* Ғ. Хәйри.

**ӘҺӘМИӘТЛЕ** *с.* **1.** Әһәмиәте (1 мәғ.) яғынан ниндәйҙер урын тотҡан. *Әһәмиәтле мәсьәлә. Әһәмиәтле эш.*

**2.** Кәрәкле, урынлы, мөһим. *Әһәмиәтле фекер. Әһәмиәтле һүҙ.*

**ӘШҒАР** [*гәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Шиғыр. *Ғәбитов, һин яҙма әшгар, ат кәләмде, утка һал.* Ш. Бабич.

**2.** Шиғриәт. *Мәжит Ғафури әшгарында үрнәк алган баштарак Аҡмулланан.* С. Яҡшығолов.

**ӘШЕП** *и. диал.* Нимәнеңдер билдәле бер самаһы. *Әшептән ашыу. Әшептән тыш.*

**ӘШЕҮӘ** *с. диал.* Насар, хөрт. *Магазинга әшеүә генә тауарҙар килгән.*

**ӘШЕҮӘТҺЕҘ** *с. диал.* Күрмәлекһеҙ, килбәтһеҙ. *Әшеүәтһеҙ кеше.* ■ *«Ошомо гәжәйеп соҡорҙарың?» — тим, үҙем төбөндә ҡыҙгылт мәте катыш таш катланып яткан әшеүәтһеҙ соҡорга ҡарайым.* Ә. Вахитов.

**ӘШЙӘ** [*гәр.*] *и. иҫк. кит. кар.* **нәмә** 1, 2. *Ер йөҙөндә һәр бер әшйә был ваҡытта [таң менән] күҙгәлә.* С. Яҡшығолов. *Был донъя диңгеҙендә һәр бер әшйә, карарһыгыҙ, туктамай тулкынланмаҡта.* Я. Юмаев.

**ӘШКӘМӘ** *и. диал.* Өшкәмә. *[Мозой:] Әле генә Әпкәләй беҙҙең ауылга килде. .. Могайын ул берәй әшкәмә ҡороп йөрөй торгандыр.* Д. Юлтый.

**ӘШКӘР: әшкәр итеү** хәбәр итеү, иҫкәртеү. *Белгәнемде әйтмәһәм, йортҡа әшкәр итмәһәм, илдең күңеле калыр, тим* (Ҡобайырҙан).

**ӘШКӘРТЕҮ** *к.* Алдан хәбәр итеү; иҫкәртеү. *Ҡайтыуы хакында ул [Үтәголов] көн элгәре әсәһенә хат аша әшкәртеп ҡуйҙы.* Ж. Кейекбаев.

**ӘШКӘРТМӘ** *и. кит.* Иҫкәртмә.

**ӘШКӘРӘ** [*фарс.*] *с.* Билдәле булған, асыҡ, йәшерен түгел. *[Зариф:] Уларҙың [батша менән алланың] әшкәрә вә йәшерен эштәрен беҙгә мәҙәкәре ҡылыу мәмнүгдыр.* Н. Ҡәрип. **Әшкәрә итеү** *шул уҡ* **әшкәр итеү** (*кар.* **әшкәр**).

**ӘШКӘРӘЛӘҮ** *к. диал.* Әшкәртеү.

**ӘШКӘРӘН** *р. һөйл.* Бөтә тауыштан. *Әшкәрән ҡысҡырыу.*

**ӘШНӘ** [*фарс.*] *и.* Иптәш, дуҫ. *Әшнә булыу.* // *Әшнә кешеләр.* ■ *[Мулла:] Ҡалала милли театр артистары менән бик әшнә инем.* С. Агиш.

*Акташ тигән ауылда күршеләш кенә ике дуҫ йәшәгән. Улар бәләкәй сактан уҡ бер-береһе менән бик әшнә булған, бергә балыҡҡа йөрөгән, еләк тирғән, сәкән һуҡҡан* (Әкиәттән).

**ӘШНӘЛЕК** *и.* Танышлыҡҡа, туғанлыҡҡа нигеҙләнгән мөнәсәбәт. *Калкаманов эштә бер төрлө лә коҙа-коҙағыйлыҡ, әшнәлек күрһәткәне юҡ.* С. Агиш.

**ӘШНӘЛЕКҺЕҘ** *с. иҫк.* Килешһеҙ, ярашһыҙ. *Башкорт халкы донъяла бөтәсәк, тип, хөкөм итеп тә ҡуйҙылар. Ләкин был хөкөмдөң ни кәҙәр ашығыс вә ни кәҙәр ҡануны ғаләм илә әшнәлекһеҙ икәнлеге ап-асыҡ күренеп тора.* Х. Ғәбәши.

**ӘШНӘЛӘШЕҮ** *к.* Дуҫлашыу. *Һуңғы ике-өс йыл эсендә Мәсәбих карт менән Шағәли мәзин бик әшнәләшеп киттеләр.* В. Исхаҡов. *Бер кыҙып алғас, сатан Митя ул тиклем ҡурҡыныс булып күренмәне, хатта Платов менән, үҙенә күрә, әшнәләшеп алды.* Д. Исламов.

**ӘШТЕР-ӨШТӨР** *р.* **1.** Көс-хәл менән, яй ғына, иплән кенә. *Әштер-өштөр генә эшләп йөрөү.* ■ *[Иркәбикә инәй] әштер-өштөр килеп йәшәп ята.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Арлы-бирле. *Әштер-өштөр королған кыуыш.*

□ **Әштер-өштөр итеү** 1) көс-хәл менән, яйлап кына ҡуҙғалыу. *Әштер-өштөр итеп йөрөү;* 2) арлы-бирле эшләү. *Әштер-өштөр итеп ҡуйыу.*

**ӘШТӘ** *и. диал.* **1.** Кәштә, һикәлтә. *Тау әштәһе.*

**2.** Таҙғаҡ. *Әштә короу.*

**ӘШӘ**[1] *и. диал.* Яйла. *Әшәгә менеү. Әшәлә бесән сабыу.*

**ӘШӘ**[2] *и. диал.* Ау энәһе, аша.

**ӘШӘКЕ** *с.* **1.** Бысраҡҡа буялған, бысраҡ тейгән; бысраҡ. *Әшәке кейем. Әшәке кул.* ■ *Өлкән быҙауҙарҙың ояһы әҙәм карағыһыҙ әшәке.* И. Ғиззәтуллин. *Трактир һаҫыҡ, караңғы, әшәке, төтөн тулы булыуға карамаҫтан, унда халыҡ мыжғып тора.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Таҙа булмаған, әрпеш, бысраҡ (кешегә ҡарата). *Әшәке кеше. // Әшәке тороу.* ■ *Әллә кем бисәләренең әшәке, һалаҡ булғанлығын .. тәмләп һөйләнеләр.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** *кусм.* Әхлаҡ ҡағиҙәләренә, тәртипкә һыймаҫ; боҙоҡ, оятһыҙ. *Әшәке һүҙ. Әшәке эш. // Әшәке итеп һүгенеү.* ■ *Взятканы — үткәндәрҙең әшәке бер эше ти ул [Кәрип].* Т. Арслан.

**4.** *кусм.* Насар. *Әшәке гәҙәт. Әшәке ниәт. Әшәке уй.*

**ӘШӘКЕЛЕК** *и.* Әшәке (1—3 мәғ.) булыу ғәҙәте. *Ҡайһы бер балаларҙың тырнаҡ кимереү кеүек яман гәҙәте бар. Был эш әшәкелек кенә түгел, ә һаулыҡ өсөн дә зарарлы.* В. Ғүмәров. *Һинең кеҙҙәрең гел аламалыкты, әшәкелекте генә күрә.* И. Абдуллин. *Әмирханов ниндәй яуыз кеше, ә? .. Әшәкелеккә нисек барырға кәрәк.* С. Агиш.

**ӘШӘКЕЛӘНЕҮ** *к. һөйл.* **1.** Бысраныу, әшәке төҫ алыу.

**2.** Насарға, боҙоҡҡа әйләнеү, әшәке булыу.

**ӘШӘКЕЛӘҮ** *к. һөйл.* **1.** Нимә менәндер бысратыу, әшәке хәлгә килтереү. *Балаҫты әшәкеләү. Иҙәнде әшәкеләү.*

**2.** *кусм.* Әшәке итеп күрһәтеү, насарлау, яманлау. *Кешене әшәкеләп һөйләп, данын һатыу.*

**ӘШӘЛСӘ** *и.* Төҙ һабаҡлы, һабаҡты уратып сыҡҡан киң ҡыяҡ япраҡлы, йомарсаҡ тамырлы, өйкөм сәскәле үлән (тамыры дарыу яһау өсөн ҡулланыла).

**Ә-ӘМ** *ымл.* Ҡапыл бер ер ауыртҡанда әйтелә. *Ә-әм, бармағым!*

# Ю

**Ю** Башҡорт алфавитының ҡырҡ беренсе хәрефе.

**ЮА́НЬ** *и.* Ҡытайҙағы аҡса берәмеге.

**ЮБИЛЕ́Й** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Берәй ваҡиғаның йәки кеше ғүмеренең, эшмәкәрлегенең, учреждение, ҡала йәшәүенең йыллығы (ғәҙәттә унар, йөҙәр һ. б. йыл менән иҫәпләнә). *Юбилей датаһы. Юбилейҙы билдәләү.* / Шул уңай менән үткәрелгән тантана, байрам. *Юбилей кисәһе. Юбилей үткәреү.*

**ЮБИЛЯ́Р** [*рус.*] *и.* Юбилейы байрам ителгән кеше, учреждение, ҡала һ. б. *Юбилярға теләктәр әйтеү. Юбилярҙы ҡотлау.*

**Ю́БКА** [*рус.* ⟨ *фр.*] *и.* Билдән түбән кейелә торған итәкле ҡатын-ҡыҙ кейеме. *Тәзкирәнең .. өҫтөндә киң итәкле ҡара юбка менән ал кофта.* С. Агиш.

**ЮВЕЛИ́Р** [*рус.* ⟨ *гол.*] *и.* Аҫыл таш, алтын, көмөштән төрлө матур нәмә яһаған оҫта. *Ювелир эше.* / Шул оҫта яһаған нәмәләрҙе һатыусы. *Ювелир магазины.*

**ЮҒАЛТЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **юғалтыу.** *Юғалтылған нәмә.*

**ЮҒАЛТЫУ** *к.* **1.** Абайһыҙҙан онотоп, төшөрөп ҡалдырып, юҡ итеү. *Документтарҙы юғалтыу. Китапты юғалтыу.* ■ *Сәғәттең тышы көмөш, өҫтө алтын һәм төрлө таш менән биҙәкләнгән. Шуға күрә мин уны юғалтмай, һаҡлап йөрөй инем.* Д. Юлтый. *Хәсед күҙгә был хатымды уҡытмағыл, иғтибарһыҙ ергә ҡуйып юғалтмағыл* (Бәйеттән). / Кем йәки ниҙеңдер ҡайҙалығын, урынын белеү, күреүҙән туҡтау. *Ҡуян эҙен юғалтыу.* ■ *[Әбей:] Ауылдағылар беҙҙе юғалтып торормо икән, ҡайҙа киткәнде әйтмәнек.* М. Тажи.

**2.** Кем, ниһеҙ ҡалыу, кемгә, нәмәгә эйә булыуҙан туҡтау, кемдән, ниҙән яҙыу. *Абруйҙы юғалтыу. Дуҫтарҙы юғалтыу. Өмөттө юғалтыу. Ышанысты юғалтыу.* ■ *Улар балалар, был үлемдең бөтә ҡурҡынысын, дәһшәтен яңы ғына төшөнгән кеүек, аталарын бөтөнләй юғалтыуға әле генә ышанған кеүек, өсөһө бер юлы илап ебәрҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Ниндәйҙер сифат, рәүеш, хәлдән яҙыу. *Иҫте юғалтыу. Йоҡоно юғалтыу. Кешелекте юғалтыу. Көстө юғалтыу. Мөмкинлекте юғалтыу. Оятты юғалтыу. Сәләмәтлекте юғалтыу.* ■ *Күптән түгел алһыу еҫле сәскә ҡыраууҙан һуң төҫөн юғалтҡан.* Ғ. Хәйри.

**4.** Ниҙелер ҡулдан ысҡындырып, зыян күреү. *Байлыҡты юғалтыу.*

♦ **Башты юғалтыу** 1) башты һәләк итеү. *[Имай:] Айбулаттың бөтә тирә-як ярлыларын эйәртеп алып, башыңды югалта яҙғаныи онотаһың, уга тагы ышанмак булаһың.* һ. Дәүләтшина; 2) үҙ-үҙеңде тоторлоҡ, аңларлыҡ хәлдән яҙыу. *Үлем ҡурҡыныcынан тамам башын югалтҡан Аҙнагол һүҙһеҙ баш эйә.* З. Биишева.

**ЮҒАЛТЫУҺЫҘ** *р.* Юғалтыуға, тәләф итеүгә юл ҡуймай. *Игенде югалтыуһыҙ йыйып алыу.*

**ЮҒАЛЫУ** *ҡ.* **1.** Абайһыҙҙан онотолоп, төшөп ҡалып, юҡ булыу. *Сәгәт югалган. Югалган акса.* ■ *[Бабай:] Эшләп йөрөгәндә балтаны онотоп ҡалдыргаимын. Иртәгеһенә барһам, балта юк .. Югалды ла ҡуйҙы.* М. Тажи.

**2.** Күҙҙән юҡ булыу; ғәйеп булыу. *Сыгып югалыу. Хәбәрһеҙ югалыу.* ■ *Шафик колхоздың эҙһеҙ югалган ике танаһын эҙләп йөрөүен егеткә әйтмәгәненә үкенде.* Я. Хамматов. / Ишетелеүҙән, тойолоуҙан туҡтау, ишетелмәҫ, тойолмаҫ булыу. *Эңер алдынан .. Якуп карттың ҡурай тауышы гына колакка салыныр-салынмаҫ ишетелеп тора ине. Ул да югалды.* Т. Хәйбуллин. *Моңһоу йәнде борсоп, бойоҡһоткан бөркөү таң тынлыгы югалды. Таң тынлыгы һыңынан яңгырап торган, йән тирбәткән хаят уянды.* Ғ. Амантай.

**3.** Бар булған ерҙән юҡҡа әйләнеү, юҡҡа сығыу. *Ҡайҙа югалды яҙыҡһыҙ аҡ сагым, моңһоҙ сагым?* Ш. Бабич. *[Бабай:] Зөлхизәм менән бергә бөтәһе лә югалды.* З. Биишева.

**4.** Бушҡа әрәм булыу, файҙаһыҙға китеү. *[Ҡатын:] Кеше күҙ йәше бер ваҡытта ла югалмай ул. Һинең хәләл көсөң, уларҙың харам тамагы.* һ. Дәүләтшина.

♦ **Баш юғалыу** һәләк булыу. **Юғалып ҡалыу** ниҙәндер аптырап, ни эшләргә белмәү. *Һис көтмәгәндә [председатель булыуга] яһалган тәкдимдән Ҡотлогужа, ни әйтергә белмәй, югалып ҡалды.* Ғ. Әмири.

● *Ҡулалмаш эш югалмаҫ.* Әйтем.

**ЮҒАРҒЫ** *с.* Юғары урынлашҡан; өҫкө. *Йорттоң югарғы ҡаты.*

**ЮҒАРЫ** *с.* **1.** Ерҙән, билдәле бер кимәлдән өҫтәге. *Югары тараф. Югары урын.* // *Югарыга ҡарау. Югарыла тороу. Югарыга уҙыу.* // *Югары менеү.* ■ *Ҡояш сыгыу менән югарыла немецтарҙың аэропландары йөрөй башланы.* Д. Юлтый. *[Фатиә:] Югарыраҡ ултыр, нишләп улай ишек төбөнән генә ултырҙың.* Т. Йәнәби.

**2.** Һыуҙың, елдең һ. б. йүнәлешенә ҡаршы яғындағы. *Югары яҡ.* ■ *Зәлифәкәй барган югары оска, юк йомошкайҙарын бар итеп* (Халыҡ йырынан).

**3.** Һаны, көсө, интенсивлығы һ. б. йәһәтенән әҙ түгел, күп. *Белемдең югары кимәле. Быуҙың югары баҫымы. Югары вольтлы аппаратура. Югары күрһәткестәр. Югары темп. Югары урожай. Югары температура.* ■ *Ниңә әйтә алмайһың? Бик асыҡ: югары һөҙөмтәгә ирешеп булмай.* С. Агиш. / Башҡалар араһында әһәмиәте, тотҡан урыны буйынса ҙур булған. *Югары вазифалы кеше.* ■ *Был киләсәктең мәгәнәһе хәҙер Айбулаттың быга тиклем күҙ алдына килтергән бөтә мәгәнәләренән дә югары, бөтәһенән дә киң һәм якты ине.* һ. Дәүләтшина.

**4.** Иң баш, етәксе булған. *Дәүләт власының югары органдары. Югары командирҙар составы. Югары суд инстанцияһы.* // *Югарынан килгән вәкил.* ■ *Югарынан килгән әмерҙең ашыгыс булыуы зильскийга ла, кулактарга ла үҙ эштәрен йәйләп .. эшләргә ирек бирмәне.* Ғ. Дәүләтшин.

**5.** Үҫештең, камиллашыуҙың иң ҡатмарлы, иң һуңғы баҫҡысын тәшкил иткән. *Ойоштороуҙың югары формаһы. Пилотаждың югары формалары.*

**6.** Алда булған менән сағыштырғанда күпкә ҡатмарлы һәм үҫешкән. *Югары математика. Югары үҫемлектәр.* / Уртанан артабан булған (белем системаһында). *Югары белем. Югары уҡыу йорто.*

**7.** Сифаты йәһәтенән бик яҡшы. *Югары баһа. Югары квалификация. Югары сифатлы тауар.* // *Югары баһалау.*

**8.** Әһәмиәте йәһәтенән өҫтөн; маҡтаулы, мөһим. *Югары награда. Югары ихтирам. Социалистик Хеҙмәт Геройы тигән югары исем. Әҙәбиәттең югары тәгәйенләнеше.* ■ *... Сыртлановтың коммерсия эшен .. сәнгәттән югары ҡуйыуынан көлдөм.* С. Агиш.

**9.** Тәрән, ғәҙәти булмаған йөкмәтке менән тулы. *Югары тойго. Югары темаларга һөйләшеү.* ■ *Уның [Юлияның] йөрәге әллә ниндәй бер югары, таҙа, саф дуҫлыҡ, мәңгелек ышаныс менән тулҡынып тибә ине.* һ. Дәүләтшина.— *Ә шунан һуң ата һәм әсәгә кешелектең мөхәббәт тигән югары хисе килеп ҡушылган.* С. Агиш.

**10.** Күтәренке рухлы, тантаналы (телгә, стилгә ҡарата). *Югары стиль.*

**11.** Нәҙек, ҙур йышлыҡтағы тирбәлеүҙәр арҡаһында барлыҡҡа килгән (тауышҡа ҡарата). *Бик югары тауыш менән ҡысҡырган Хәлимовка тегеге ҡатын-ҡыҙҙар гәжәпләнеп ҡараны.* Д. Юлтый.

**ЮҒАРЫЛЫҠ** *и.* **1.** Юғары урын. *Мин .. югарылыкта, ә башкалар таң ҡалып, аҫта тора.* С. Агиш.

**2.** Ниҙеңдер һанлы күрһәткестәр менән билдәрелгән дәүмәле, көсө һ. б. *Баҫым югарылыгы Температура югарылыгы. Ток көсөргәнешенең югарылыгы.*

**3.** Ниҙең дә булһа үҫешенең, алға китешенең юғары дәрәжәһе, юғары кимәле. *Аң югарылыгы. Культура югарылыгы.* ■ *Бөтәһе лә бар ауылда. Әммә иң мөһиме — кешеләрҙең рухи байлыгы, уй-фекер югарылыгы, эске гармонияһы.* Р. Шәкүров.

**ЮҒИҺӘ** *ҡарш. терк.* Мәғәнә яғынан бер-беренә ҡаршы ҡуйылған ике һөйләм йәки һөйләм киҫәген теркәү өсөн ҡулланыла; юҡһа. *Йәнтимерҙе эҙләп табырга тырыштым, югиһә ҡараңгыла яңгыҙыма ҡайтыу ҡыйын булыр ине.* С. Агиш. *[Ира:] Ҡыскырып көлмәйек, югиһә ишетерҙәр.* Д. Юлтый.

**ЮҒЫРТАҠ** *с. диал.* Юртаҡ.

**ЮҒЫРТЫУ** *ҡ. диал.* Юртыу.

**ЮЙ** *и. диал.* Тырнаҡ йышҡы.

**ЮЙҒЫС** *и.* Яҙғанды юя торған резинка. *Ҡара юйгысы. Ҡәләм юйгысы.*

**ЮЙҘЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* ➔ **юйыу.** *Яҙыуҙы юйҙырыу.*

**ЮЙМА** *и. кар.* **юйғыс.**

**ЮЙЫЛЫУ** *ҡ.* **1.** *төш. кар.* **юйыу** 1, 2. *Юйылған яҙыу.* ■ *Халыҡ иждадына яҡын булған кешенең эҙе бик оҙаҡ юйылмай тора ул.* К. Мәргән. *Йылдар ниҙе генә оноттормай ул! Ошо төрлөһө төрлө ерҙә ятып ҡалған кешеләрҙең дә ҡүбеһе экренләп хәтерҙән юйыла килә.* Р. Солтангәрәев. *Афарин, их доньяға шатлыҡ килә, юйыла золмат, йылмайып аҡлыҡ килә.* Ш. Бабич.

**2.** Ниндәйҙер хәл йәки сифат юҡҡа сығыу, юҡ булыу; бөтөү. *Офоҡҡа тоташҡан күк сите ҡыҙғылт буяуға мансылды. Ул әкренләп юйыла барған һайын эңер яҡынлашты.* Я. Хамматов. *Был көтөлмәгән хәлгә шаҡ ҡатҡан малайҙар, зиһендәре юйылып, ауыҙ асып ҡалды.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЮЙЫН** *с. диал.* Булдыҡһыҙ.

**ЮЙЫУ** *ҡ.* **1.** Һыпырып, һөртөп, ҡырып юҡ итеү; бөтөрөү *Яҙғанды юйыу.* ■ *Аҡ өҫтөнә ҡара тамһа, юйыуҙары еңел түгел!* А. Игебаев. *Төлкө үҙенең эҙен юйыу өсөн ҡарҙан ҡойроғон һөйрәтеп барған* (Әкиәттән). / *күсм.* Бөтөрөү, хәтерҙән һ. б. сығарыу, онотоу. *Ҡайһы саҡта уның [ҡатындың] алдына ятып иркәләнәбеҙ. Ә ул беҙҙең сәстән һыйпай, йә булмаһа арҡанан һөйә торғайны. Рәхәт була ине, был хәрәкәттәр менән беҙ үҙебеҙҙең йәтимлекте юйған кеүек була торғайны.* С. Агиш. *Бурҙар бөткән хәлдә лә беҙ һине [Аҡбай] «кит!» — тип ҡыумабыҙ, күптән килгән дуҫлыҡты беҙ һис ваҡытта юймабыҙ.* Ҡ. Даян.

**2.** Кемде йәки ниҙелер һәләк итеү; бөтөрөү. *Баяр кушкан кешеләр Салауатты юйырға, баярҙан мал алырға уңай саҡ эҙләгән.* М. Буранғолов. *Доньяя капиталын юйыр өсөн ярлы үткер ҡылыс ҡайраны.* Х. Ғәбитов. / Кемең йәки нимәңделер юғалтыу. *Үҙ башыңды юйыу.* ■ *Һайрай турғай, һайрай турғай, балаһын юйған, буғай* (Халыҡ йырынан).

**3.** Ниндәйҙер хәл йәки сифатты юҡҡа сығарыу; юҡ итеү; бөтөрөү. *Аҡылды юйыу. Аңды юйыу. Гонаһты юйыу. Сабырлыҡты юйыу.* ■ *Йәй таңы тиҙ һыҙылды. Ай яҡтыһы аҡһылланып, нурын юйҙы.* Һ. Дәүләтшина. *Башланды тынлыҡ. Әмирханов был тынлыҡты юйырға теләне.* С. Агиш. *Бынан ары кешенең эшен ҡалдырып, иҫегеҙҙе юйып йөрөмәгеҙ!* Ф. Иҫәнғолов.

**ЮҠ** *мөн.* **1.** Кемдең йәки ниҙеңдер ғәмәлдә булмағанлығын белдерә; *киреһе* бар. *Юҡ нәмә. Юҡ сәбәп.* ■ *Һауа тымыҡ. Япраҡ ҡағырлыҡ ел юҡ.* Д. Юлтый.

**2.** Яуап рәүешендә килеп, кире ҡаҡҡанды, риза булмағанды белдерә; *киреһе* эйе. *«Әйтсе, Миңьян, ул бит Сәлмән малы?» «Юҡ, һин тапҡан уны, Ҡоләхмәт».* Ғ. Сәләм.

**3.** Һөйләмдәге эш-хәрәкәттең инҡар ителеүен аңлатып, кире мәғәнә бирә. *Минең бит быйаса үҙ алдыма эшләп көн күргәнем юҡ.* С. Агиш. *Бына, ҡарт, ышанһаң-ышан, ышанмаһаң — юҡ.* Т. Йәнәби. / Һөйләм алдында килеп, киҫкен рәүештә кире ҡаҡҡанды белдерә. *Юҡ, булманы ташҡын күңелде баҫтырып.* Ш. Бабич.

**4.** *и. мәғ.* Булмаған нәмә йәки эш-хәл.— *Айбулат, малы булһа, аямаҫ ине, юҡты ҡайҙан алһын.* Һ. Дәүләтшина. *Барыбер доньяя өсөн юғың менән барың һинең!* Ш. Бабич.

**5.** *и. мәғ.* Әһәмиәтһеҙ, буш нәмә. *Юҡ менән булыу.* ■ *Ҡит әле, тинем,— юҡ менән башыңды ватма».* С. Агиш.

□ **Юҡ булыу** күҙгә күренмәҫ булыу, юғалыу. *Ауылыбыҙҙан күҙ асып йомғанса юҡ булдыҡ икәү.* Ш. Бабич. **Юҡ итеү** бөтөрөү. *Фашистарҙы юҡ итергә ашҡына беҙҙең йөрәк.* Б. Бикбай.

♦ **Юҡҡа сығыу** 1) тамам бөтөү. *Һай, һис кенә лә үтмәҫ, үҙгәрмәҫ кеүек ине лә баһа ул көндәр. Күҙ асып йомған арала бөтәһе лә юҡҡа сыҡҡанын тоймай ҙа ҡалынды.* З. Биишева; 2) тейешле сифат-рәүеште юғалтыу, бушҡа әйләнеү. *Бына шулай беҙҙең быуында ла юҡҡа сыға бер кешеләр!* Ғ. Сәләм. **Юҡ тигәндә [лә]** иң кәмендә. *[Һунарсы] ҡара һуйыр, юҡ тигәндә лә сел-фәләч алып ҡайта.* М. Тажи. **Юҡтан бар итеү** ҡыйынлыҡ менән етештереү. **Юҡ-юҡ та** ҡайһы берҙә, һирәк-һаяҡ. *Вероника .. юҡ-юҡ та уйсанланып ала ине.* Д. Исламов. **Юҡтың башын ауырттырыу** булмаҫтай хәбәр һөйләү.

● *Барҙың бары ла бар, юҡтың өйө лә тар.* Әйтем. *Һуғыш күптән сыҡмай, юҡтан сыға.* Әйтем.

**ЮҠ-БАР** *и. йыйн.* **1.** Ваҡ-төйәк әһәмиәтһеҙ нәмәләр. *Юҡ-бар менән булыу. Юҡ-барҙы күреү. // Юҡ-бар нәмә. Юҡ-бар хаҡ.* ■*Гәрәй белә, үрелмәй юҡ-барға, иң кәрәк нәмәләрҙе ал[а].* Б. Бикбай.

**2.** Буш, ялған һүҙ. *Юҡ-барҙы һөйләү. Юҡ-барға ышаныу. // Юҡ-бар хәбәр. Юҡ-бар һүҙ.*

**ЮҠ-БУШ** *с.* Әһәмиәтһеҙ, буш. *Юҡ-буш уй. Юҡ-буш һүҙ.* ■ *Байҙар яңы закон буйынса бөтә ерҙе юҡ-буш хаҡҡа ғына төшөрөп, отрубҡа ҡырҡып алып бөттө.* Һ. Дәүләтшина.

**ЮҠҠА** *р.* **1.** Һис кәрәкһеҙгә; бушҡа. *Һиңә өйләнеү тураһында уйларға ла ярамай. Уҡырға кәрәк, ундай еңел уй менән юҡҡа булышма.* Т. Йәнәби.

**2.** Сәбәпһеҙҙән; бушҡа. *Юҡҡа көлөү. Юҡҡа илау. Юҡҡа хафаланыу.* ■ *Бер нәмә лә ерҙә юҡҡа түгел: йә яҡшыға, йәки яманға.* М. Уразаев.

**3.** Үкенес белдергәндә әйтелә. *Юҡҡа бармағанмын.*

♦ **Ерле юҡҡа** *кар.* **ерле** [2].

**ЮҠЛАУ** *ҡ. диал.* **1.** Юҡ тип уйлау, юҡҡа һанау.

**2.** *кар.* **юҡһыныу.** *Туғайҙарға инеп йоҡлағанда, гәзиз балаларымды юҡланым* (Халыҡ йырынан).

♦ **Юҡты юҡлау** юҡты бар итмәк булыу. *[Тимергәле:] Юғын юҡлап йөрөгән бала — арыу бала. Йәш егет Айбулат.* Һ. Дәүләтшина.

**ЮҠЛЫҠ** *и.* **1.** Ғәмәлдә булмаған хәл. *Көс юҡлығы. Ышаныс юҡлығы. Ямғыр юҡлығы.* ■ *[Ҡотлояр:] Айбулаттың был арала өйҙә юҡлығы билгә һуғып тора.* Һ. Дәүләтшина. *Нина Тимерҙең үҙенә ятыр урын юҡлығын күргәс: — Ә һин ҡайҙа ятаһың? — тип һораны.* Б. Бикбай.

**2.** Тормоштағы етешһеҙлек; ярлылыҡ. *Ҡайҙа барма — унда юҡлыҡ ҡайһына еткерәйем.* Ш. Бабич.

**3.** *грам.* Эш-хәрәкәттең булыуын кире ҡағыуҙы белдергән грамматик категория. *Юҡлыҡ формаһы. Юҡлыҡ ялғауы.*

**ЮҠСЫЛ** *и. ҡар.* **юҡһыл.**

**ЮҠСЫЛЛЫҠ** *и. һир.* Тормоштағы матди етешһеҙлек; ҡыҫынҡылыҡ. *Юҡсыллыҡта йәшәү.*

**ЮҠҺА** *ҡарш. терк.* Мәғәнәһе яғынан бер-беренә ҡаршы ҡуйылған ике һөйләмде йәки һөйләм киҫәген теркәү өсөн ҡулланыла; юғиһә. *Әлдә һин бар, юҡһа донъям мәғәнәһеҙ һәм файҙаһыҙ.* Ш. Бабич.

**ЮҠҺЫЛ** *и.* Иҙелгән, ярлы кеше. *Аҡ батшаның туғандары .. имә бирҙе юҡһылдарҙың елеген.* Р. Бикбаев. // *Төн урталарында тыңланым мин ил күгенең нескә моңдарын, тыңланым мин юҡһыл ил халҡымдың, ас халҡымдың ҡайғы, моң-зарын.* Б. Ишемғол.

**ЮҠҺЫНДЫРЫУ** *к.* Һағыш уятып, бошондороу. *Бала киткәне бире юҡһындырып тора.*

**ЮҠҺЫНЫУ** *к.* Кем йәки ниҙеңдер юҡ булыуынан бошоноу. *Таиба әбей: Ҡоҙаса киткәс, уны юҡһынып торормон әле.* З. Биишева. *Һағындырҙы таллы Миәс буйын, тыуған яҡтарымды юҡһынам.* К. Кинйәбулатова.

**ЮҠҺЫРАУ** *к. диал.* Юҡһыныу.

**ЮҠШЫ** *и. диал.* Ҡара бойҙай ярмаһы.

**ЮЛ** [1] *и.* **1.** Йөрөү өсөн хеҙмәт иткән ер һыҙаты. *Оло юл. Таш юл. Асфальт юл. Арба юлы. Машина юлы. Ҡышҡы юл. Юл буйы. Юл саты. Юл һалыу.* ■ *Юл буйлап киләм, киләм, артҡа әйләнеп ҡараһам, шаҡтай ара юл киткәнмен.* М. Тажи / Һыуҙан йәки һауанан даими рәүештә хәрәкәт барған урын, арауыҡ. *Һауа юлы. Һыу юлы.* ■ *Күк юлдары буйлап, йырлашып, ҡыр ҡоштары күктән оса.* Ғ. Амантай. **Йомро юл** *шул уҡ* **берләм юл** (*ҡар.* **берләм**). **Өҙәрем юл** ҡуныш, төшөп китер урыны булмаған алыҫ аралағы оҙон юл. **Һуҡма юл** *диал. ҡар.* **һуҡма** [1]. **Юл ҡалыу** йөрөрлөк юл бөтөү, юл өҙөлөү. **Юл сабыу** ситкә боролоп, юл биреү. *Һуҡмаҡтың тарлығы шул тиклем — ҡаршы кеше осраһа, юл сабырға ирек юҡ.* Ш. Шәһәр. **Юл төшөү** 1) һыу-һыл ҡайтып, йөрөрлөк юл асылыу. *Юл төшкәс, юлға сығыу;* 2) ыңғай тура килеп, ҡайҙалыр барыу, һуғылыу. *Юл төшкәндә күреп китеү.* **Юл яҙҙырыу** *шул уҡ* **эҙ яҙҙырыу** (*ҡар.* **эҙ** 1). **Юлды бикләү** үткәрмәй кәртәләү. *Арҡыры тороп, юлды бикләү.* **Юлды быуыу** 1) кемдең йәки нимәнеңдер үтер юлына кәртә ҡуйыу, үтер юлын бикләү. *Хаммат Байрасты ишеккә ебәрмәй юлын быуҙы.* З. Биишева; 2) кемдеңдер эш-тормоштағы иркен кәртәләү.

**2.** Ниҙер эсенән, араһынан үтер урын, үтер йүнәлеш. *Урталағы юлдан әллә кемдәрҙең аяҡтарына баҫа-баҫа барып, үҙ урыныма еттем.* С. Агиш.

**3.** Тәндең ниҙер йөрөй, үтә торған эсе ҡыуыш ағзаһы. *Аш юлы. Ҡан юлы. Үт юлы.* ■ *Өҫтән яуған ҡуйы, эре ҡар бөртөктәре .. тын юлына инеп, һулышты ҡаплай.* Ғ. Дәүләтшин.

**4.** Ҡайҙалыр табан алған йүнәлеш. *Юл алыу.* ■ *Үҙең дә был яҡҡа юл төшкәненә шөкөр итеп бөтә алмаҫһың.* З. Биишева. **Юл айҡан** бер юлы, юл ыңғайында. *Юл айҡан инеп сығыу.* **Юл алыу** йүнәлеш алыу, йүнәлеү. **Юл тотоу** билдәле бер йүнәлештә хәрәкәт итеү; йүнәлеү. *Өсәүләп район үҙәгенә юл тотто.* С. Кулибай. / *күсм.* Эшмәкәрлек йүнәлеше. *Көрәш юлы.* ■ *Атанан алтау тыуһа ине, ата юлын ҡыуһа ине* (Ҡобайырҙан). / *күсм.* Бер эште башҡарыу сараһы; ысул. *Мәсьәләне сисеү юлы.* ■ *Ҡайҙа акса күп, ҡайҙа алтын йышыраҡ, тауышлыраҡ сылтырай — унда .. еңел юл, еңел ҡул менән кәсеп итеүселәр ябырыла.* Ғ. Ғүмәр. *Эстән генә: «Әһә, һөйләшергә юл асылды», — тием.* Т. Йәнәби.

**5.** Бер йүнәлеш буйынса башҡарылған хәрәкәт; сәфәр. *Юл аҙығы. Юлға сығыу. Юлға әҙерләнеү. Юлдан ҡайтыу.* ■ *Үҫмергә түгел, олоға шомло була яңғыҙ юл.* С. Кулибай. *Алыҫ юлға әҙерләйҙәр аттарҙың иң яҡшыһын.* М. Кәрим. **Аҡ юл, юлың аҡ булһын** киткән кешегә уңышлы юл теләп әйтелә. **Юл аяғы** *ҡар.* **аяҡ** [2].

**6.** Шашка, шахмат уйынындағы йөрөш. *Ҡаралар башлай ҙа ике юлдан мат ҡуя.*

**7.** Оҙонға һуҙылған һыҙат; буй. *Бер юлы аҡ, бер юлы күк тауар.*

**8.** Бер һыҙыҡҡа яҙылған һүҙҙәр йәки башҡа тамғалар рәте. *Китап юлы.* ■ *Һәр бер бите, хатта һәр бер юлы уйҙарымдай таныш китаптың.* Х. Ҡунаҡбай. **Ҡыҙыл юл** *ҡар.* **яңы юл. Яңы** юл китап, яҙманың баштан төшөп, эскә тартып яҙған юлы. *Яңы юлдан башлап яҙыу.*

◆ **Ана бара юлың** *ҡар.* **ана** [1]. **Аҫмалы юл** йөктәрҙе (һирәкләп пассажирҙарҙы) һауанан тимер арҡанға, рельсҡа аҫып ҡуйылған бәләкәй йөк вагондарын йөрөтөү өсөн тәғәйенләнгән ҡоролма. **Ғүмер юлы** *ҡар.* **тормош юлы. Дөрөҫ юлда булыу** (*йәки* **тороу**) ғәйеп эш ҡылмай тейешенсә эш итеү, йәшәү һ. б. **Ҡош юлы** *ҡар.* **ҡош. Насар юлға төшөү** насар эшкә бирелеү, ғәйеп эш менән шөғөлләнеү. **Таҡыр юл** ҡыйынлыҡһыҙ анһат тормош. *Шиғыр эҙләп, оҙон юлға сыҡтым, ләкин таҡыр юлға сыҡманым.* М. Кәрим. **Тимер юл** поезд йөрөй торған рельслы юл. *Ун биш көн инде беҙ тимер юлда сәйәхәт итәбеҙ. Поездан поезға ултырабыҙ.* Д. Юлтый. **Тормош юлы** кешенең төрлө хәлдәр күреп, донъяла йәшәгән осоро. **Юл баҫыу** юлда барған кешене талау. *Урман. Ай-һай ҡалын урман! Элек бында ҡараҡ юл баҫҡан.* Б. Бикбай. **Юл башлау** 1) алдан барыу; 2) етәкселек итеү. **Юл биреү** 1) ситкә тайпылып, үтергә мөмкинлек биреү. *Ҡаршы килгән ылауға юл биреү;* 2) кешегә ниҙер эшләргә мөмкинлек биреү. **Юлға баҫыу** тәртипкә килеү. **Юлға саң яҡтырмау** күп йөрөү. **Юлға һалыу** тәртипкә килтереү, яйға һалыу. *Эште юлға һалыу.* **Юлдан яҙыу** насар эшкә, боҙоҡлоҡҡа бирелеү. **Юл ҡуйыу** ирек ҡуйыу, мөмкинлек биреү. **Юлыңда бул** кемделер ҡыуғанда, ебәргәндә әйтелә. *«Ағай, юлыңда бул, ҡамасаулама», — тине Хәкимйән.* Ф. Иҫәнғолов. **Юлың таҡыр** ебәрмәй тотҡан кеше юҡ, тигән мәғәнәлә әйтелә. *[Бай:] Сыкһаң, ана — юлың таҡыр, китә бир.* Т. Хәйбуллин.

● *Алтын керһә, фәрештә юлдан сығыр.* Әйтем. *Ат йөрөтмәй, юл йөрөтә.* Әйтем. *Сығынсы ат юлда туҙа, уңмаған кеше эште боҙа.* Әйтем. *Урманлы юл — бер ҡат тун.* Әйтем. *Юл аҙабы — гүр ғазабы.* Әйтем.

**ЮЛ** [2] *и.* Күрһәтеү алмаштары, рәт һандары һәм ваҡытҡа бәйләнешле ҡайһы бер ҡылым формалары менән килеп, эш-хәлдең айырым бер булмышын белдерә. *Был юлы. Уҙған юлы.* ■ *[Яланбикә:] Бына, икенсе юлы ауыҙыңды йыйып һөйлә.* Һ. Дәүләтшина. *[Бай:] Хәҙер ҡаҙанға ит һал. Бер юлға Ғәләү ҙә беҙҙең менән ашаһын.* Т. Йәнәби.— *Шайтан беләме ни нindәй күҙгә нindәй күлдәк кәрәген. Киләһе юлы шундайҙы алып киләм, тигәс, тағы ла киреләнә.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Бер юлы** бер ыңғайҙан. *Пароход күҙгала башлағас та бөтәһе бер юлы палубаға сығып баҫты.* М. Тажи.

**ЮЛАЙ** *и. ҡар.* **юл** [2]. *Ул [атайым] был юлайы мине алып барманы.* С. Кулибай.

**ЮЛАҠ** *и.* **1.** Буй булып төшкән һыҙат. *Юлаҡ-юлаҡ аҡҡан тир. Юлаҡ булыу.* ■ *Кешекәйҙең сикәһенән .. ҡан юлаҡтары һуҙылып төшкән.* Б. Бикбай.

**2.** *геол.* Тау-таш егенә тулған мәғдәнле тоҡом. *Алтын юлағы.*

**3.** Һыу йырып яһаған эҙ. *Һыу юлағы.*

● *Ат әйләнеп төйәген табыр, һыу әйләнеп юлағын табыр, ир әйләнеп илен табыр.* Әйтем.

**ЮЛАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Юлаҡ (1 мәғ.) булыу, юлаҡҡа әйләнеү. *Суйын, корос иретеп, маңлайымдан юлаҡланып тирем аҡманы.* М. Тажи.

**ЮЛАҠЛАУ** *ҡ.* Юлаҡ (1 мәғ.) яһау, юлаҡлы итеү. *Битте юлаҡлап тир аға.* ■ *Күлдәгенең итәгенә юлаҡлап баҫҡан аллы-гөллө таҫмалар йәйгор төҫлө йылҡылдай.* Ш. Янбаев.

**ЮЛАҠЛЫ** *с.* Юлаҡ (2 мәғ.) рәүешендәге, юлаҡ булып урынлашҡан. *Юлаҡлы алтын ер аҫтында оя-оя булып ята, өҫтән балға менән һуҡҡанда алтынлы урын шаңғырап тора.* Б. Әхмәтшин.

**ЮЛАМСЫ** *и. диал.* Юлсы.

● *Юламсыға юл оҙон, көнләксегә көн оҙон.* Әйтем.

**ЮЛАТ** *и. диал.* Юлаҡ.

**ЮЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡайҙалыр юл алдырыу; йүнәлтеү. *Биш йөҙ баш мал алып, тамға һалып, барын станцияға юлаттыҡ.* Б. Ишемғол.

**2.** Килергә юл ҡуйыу; килтереү.— *Ҡана, ҡасығыҙ, ҡас!..— Малайҙар ярҙам итергә булғайны ла ҡарт: «Һеҙгә лә өлөш сығыр әле»,— тип, әлегә яҡын юлатманы.* Р. Солтангәрәев. *[Мохтар:] Янына юлатма шул әлекке күршеңде.* С. Кулибай.

♦ **Ҡуйынға йылан юлатыу** *шул уҡ* **ҡуйында йылан аҫрау** (*ҡар.* **ҡуйын**).

**ЮЛАУ** *ҡ.* **1.** Ҡайҙалыр юл алыу; йүнәлеү. *[Заятүләк:] Йондоҙ юлап, төн буйы ялһыҙ елдем, һылыу ҡыҙ.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** Кем йәки ниҙеңдер эргәһенә килеү; яҡынлау. *Рәмил һыуға аҡҡандан аҙаҡ яр буйына яҡын юлау юҡ. Өй тирәһендә генә уралабыҙ.* Н. Мусин. *Күрәҙәләр алдап, тоҫмал итеп юраһа, күңелеңде баҫыр өсөн генә һин уларға, зинһар, юлама.* С. Кулибай.

**ЮЛАУҘАШ** *и. диал.* Юлдаш.

**ЮЛАУСЫ** *и.* Сәфәр сыҡҡан, юлда барған кеше; юлсы. *Ауыл осона сығып барғанда ҡулдарына ҙур ғына сумаҙан тотҡан ике ҡатын та булды .. Теге юлаусылар һөрәнләй-һөрәнләй ҡул болғаны.* Р. Низамов. *Йылтыр ғына йылтың уттар яна, юлаусылар ҡунған ер, буғай* (Халыҡ йырынан).

**ЮЛБАҒАР** *и.* Алдан юл ҡарап барған кеше. *Йөк аттары егелде. Көтөүселәр, әйҙәүселәр һаулап-һайтлап малды туплауҙан сығара башланы. Юлбағарҙар .. алға үтте, илбағарҙар үҙ нәүбәтендә артҡа йүнәлде.* К. Мәргән.

**ЮЛБАҠСЫ** *и. иҫк. ҡар.* **юлбағар.**

**ЮЛБАРЫҪ** *и.* **1.** Бесәйҙәр ғаиләһенә ҡараған ҡара һыҙатлы, ҡыҙғылт һары төҫтәге һөтимәр эре йыртҡыс йәнлек. *Ата юлбарыҫ. Инә юлбарыҫ. Юлбарыҫ балаһы. Уссури юлбарыҫы.*

**2.** *күсм.* Ҡурҡыу белмәгән, батыр ир-атҡа ҡарата. *Беҙ арыҫлан, беҙ бит һәм юлбарыҫ — яңы Башҡортостан ғәскәре.* Ш. Бабич.

**ЮЛБАҪАР** *и.* Юлсыларҙың мал-мөлкәтен талау менән шөғөлләнгән кеше. *Урман .. Урманда быҫаҡ йөрөй: юлбаҫарҙар, ай-һай, усалдар.* Ғ. Сәләм.

**ЮЛБАҪАРЛЫҠ** *и.* Юлсыларҙың мал-мөлкәтен талау шөғөлө. *Бай сауҙа менән генә түгел, диңгеҙҙә юлбаҫарлыҡ менән дә шөғөлләнгән.* З. Биишева.

**ЮЛБАШСЫ** *и.* Ижтимағи хәрәкәткә, партияға, синыфҡа идея-политик йәһәттән етәкселек иткән кеше. *Әй, большевик, эшең ҡылдың һәр өйәҙҙә: йәшен булдың, гөрзөй булдың буржуазға. Юлың имен, юлбашсың Ленин булһа, ҡыр төл көнө, ирек булһын өйрәк-ҡаҙға!* Ш. Бабич. / Берәй төркөмгә етәкселек иткән кеше. *Ул [Новиков] бөтә һалдаттарҙы үҙенә ҡаратып алды. Шул кешеләрҙең юлбашсыһы булып алды.* Д. Юлтый.

**ЮЛБАШСЫЛЫҠ** *и.* Күмәк кешене ойоштороп, етәкләп алып барыу эшмәкәрлеге; етәкселек. *Билал ҡарттың юлбашсылығында .. юлға сыҡтылар.* Т. Хәйбуллин.

□ **Юлбашсылыҡ итеү** күмәк кешене ойоштороп, етәкләп алып барыу. *Эшкә юлбашсылыҡ итеү.*

**ЮЛҒЫНСЫ** *и. диал.* Юлаусы.

**ЮЛДАШ** *и.* **1.** Юлда бергә барған кеше. *Юлдаш булыу.* ■ *Яҡуп менән Булат ана шул ауылға китеп бара. ... Юлдаштар байтаҡ араны һөйләшмәй барҙы.* Б. Бикбай. *Мин Аҡъял батыр булам. Ә былар — юлдаштарым .. Дүртәүләп донъя ҡыҙырып йөрөп ятабыҙ* (Әкиәттән). / Юл йөрөгәндә ҡыйынлыҡтарҙы еңергә, кисерергә булышлыҡ итә торған йән эйәһе йәки нәмә.— *Бөтә малың бөтһә лә Аҡбуҙ ҡалыр янында, юлдаш булыр юлыңда.* «Аҡбуҙат». *Миәс кенә буйлап йөрөгәнемдә буҙ турғайҙы тоттом юлдашҡа* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Бер рух һәм бер теләкле кеше. *Һуҡыр күңелле әҙәмде юлдаш итмә, юлдаш итһәң, хаҡ юлыңда уңыш күрмә!* А. Игебаев. *Яңғыҙ ғына башым, юҡ юлдашым, сит илдәрҙә йөрөйөм ирекһеҙ* (Халыҡ йырынан).

**3.** (*баш хәреф менән*) Ир-ат исеме.

● *Атлы юлдаш арбалыға иш түгел.* Әйтем. *Ашты һеңгәс, маҡта, юлдашты белгәс, маҡта.* Әйтем.

**ЮЛЛАНЫУ** *к.* **1.** Ҡайҙалыр юл алыу; йүнәлеү. *Зариф артынан идараға юлландыҡ.* Й. Солтанов.

**2.** Буй һыҙат булыу, юл булыу. *Әхмәҙи тамырҙары юлланып торған оҙон ҡулдарын Фатимаға һуҙ[ҙы].* Ж. Кейекбаев.

**ЮЛЛАТЫУ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **юллау** 1, 2, 3. *Пенсия юллатыу.*

**2.** *кар.* **юллау** 3. *Юллатып барып тотоу.* ■ *[Оморҙаҡ бабай:] Йәнлекте юллатып, әй барам, әй барам. Бер тауҙы аша сығып, икенсеһенә барып мендем. Һаман киткән быныӊ эҙе.* Ж. Кейекбаев.

**3.** *кар.* **юлау** 2. *[Йәнтимер:] Булманы, Мәстүрә яҡын да килмәй. Йорт тирәһенә яҡын юллатмай.* Ғ. Вәлиев.

**ЮЛЛАУ** *к.* **1.** Юл алыу; йүнәлеү. *Иген тейәп, элеваторға юллау.* ■ *Күтәреп коммуна әләмен, юллайҙар заводтан ҡырҙарға.* Ғ. Амантай.

**2.** Билдәле бер араға барып әйләнеү, барып урау.— *Усман, мәктәп кисә утынын ташып бөттөмө? Шоферҙарыӊа әйт, өсәр юллаһа, юллаһындар, мәктәптеӊ утыны бөгөн ташылып бөтһөн.* Н. Мусин. *Сәүәних тулы сумка ит күтәреп, баҙар менән өй араһын көнөнә өсәр-дүртәр юллай ине.* Р. Ғабдрахманов.

**3.** Эҙенә, юлына төшөп, эҙләү; эҙәрләү. *Йәш ҡар өҫтөнән генә аяҙытып ебәрһә, юлларға шәп инде [һыуһарҙыӊ] үҙен, сөнки ағастан ағаска һикергәндә, ҡар ишелеп төшөп, ерҙә үҙенсәлекле эҙ ҡала.* Ә. Гәрәев. *[Бүре] ҡайтһа, төлкө лә юк, ит тә юк. Төлкөнө юллап киткән* (Әкиәттән).

**4.** Ниҙелер хәл итеү тураһында мөрәжәғәт менән артынан йөрөү. *Пенсия юллау.* ■ *Ниӊә әле .. кан заман юғалған ерҙе юллап маташаһығыҙ.* Һ. Дәүләтшина. *[Нурлы кейәү] урыҫса-башҡортса мәктәп асыуҙы ла юллап йөрөгәйне, нисектер осона сыға алманы.* Ә. Вахитов.

**5.** *диал. кар.* **юлау** 1.

● *Юғалғанды юллама, юллаһаӊ, һуӊлама.* Әйтем.

**ЮЛЛАУСЫ** *и.* Ниҙелер хәл итеү артынан йөрөгән кеше. *Пособие юллаусы. Хужалыҡ кәрәк-ярағын юллаусы.*

**ЮЛЛАШЫУ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **юллау** 3, 4. *Пенсия юллашыу. Эҙе буйынса төлкө юллашыу.*

**ЮЛЛЫҠ**[1] *и.* Мейестеӊ төтөн юлы. *Юллыҡты асыу.*

**ЮЛЛЫҠ** [2] *с.* **1.** Юл [1] (5 мәғ.) өсөн кәрәк булған. *Юллыҡ аҙыҡ. Юллыҡ кейем.* ■ *— Миӊә юллыҡ акса бир, Ырымбурға барып, донъя күреп ҡайтайым.* Б. Бикбай.

**2.** Күпмелер юлдан[1] (8 мәғ.) торған (яҙыуға ҡарата). *Дүрт юллыҡ шиғыр.*

♦ **Аяҡ юллыҡ күреү** саҡ-саҡ ҡына күреү, бик тә насар күреү. *Әхтәри бик ҡартайған хәҙер, ҡолаҡтары ишетмәй башлаған, күҙҙәре аяҡ юллыҡ ҡына күрә.* Ж. Кейекбаев.

**ЮЛЛЫҠЛЫ** *с.* Йомошҡа, юлға сыҡҡанда осраһа, уӊышҡа килтереүсән. *Юллыҡлы кеше. Юллыҡлы булыу.*

**ЮЛЛЫҠҺЫҘ** *с.* Йомошҡа, юлға сыҡҡанда осраһа, уӊышһыҙлыҡҡа килтереүсән. *Юллыҡһыҙ кеше. Юллыҡһыҙ булыу.*

**ЮЛМАҠ** *и. диал. кар.* **ара**[2].

**ЮЛМАҠ-ҺАЛМАҠ** *с. диал.* Ҡалған-боҫҡан. *Юлмаҡ-һалмаҡ нәмә.*

**ЮЛСЫ** *и.* **1.** Юл йөрөгән кеше. *Елкәләренә тоҡ аҫҡан ике юлсы ҡайҙалыр ашығып-ашығып атлай.* Д. Юлтый.

**2.** Юл эше менән шөғөлләнгән кеше, юл эшләүсе. *Был юлдарҙы шулай һәйбәт иткән юлсыларҙыӊ оҫта ҡулдары.* А. Игебаев.

♦ **Тимер юлсы** тимер юл хеҙмәткәре.

**ЮЛСЫР** *с. һир.* Юл йөрөргә яратыусан. *Юлсыр кеше. Юлсыр булыу.*

**ЮЛТЫРАҠ** *и. иҫк.* Мәшәҡәт, ҡамасау.

● *Юлаусыныӊ юлтырағы тейә.* Әйтем.

**ЮЛЫҒЫУ** (юлыҡ*ғ*) *к.* **1.** Юлда барғанда тап булыу; осрау. *Хәмзә иптәштәренән айырыла. Ул бер көтөүсегә юлығып, унан ашарға ала.* Ғ. Хәйри. *Бара ла ғына торғас та, ай, Юлғотто дуҫ-иштәренә барып юлыҡты* (Халыҡ йырынан). / Тормошта, эштә барып осрау. *Уҫал бер бәндәгә шәкерт юлыҡты, оҙаҡ тормай ике ара һүҙ ҙә сыҡты.* М. Ғафури. / *күсм.* Ниндәйҙер хәл-ваҡиғаға осрау; тарыу. *Бәләгә юлығыу.* ■ *[Һәүбән — Нәркәскә:] Аҡбуҙатыӊды алып, илемде азат ҡылып, ҡыуаныска юлыҡтым.* «Аҡбуҙат».

**2.** Тәғәйен кешегә барып етеү. *Вокзалға ингәс тә ул [һалдат] ышанмайынса, тағы бер ҡат күҙ йүгертте. Розалия юк .. Телеграмма һуккайны ла. Әллә юлыҡманымы икән?* Р. Низамов. *Апырама, ҡотлау хатым һиӊә юлыҡҡанға һуӊыраҡ.* А. Игебаев.

**ЮЛЫҠТЫРЫУ** *к.* **1.** Юлда барғанда тап иттереү; осраштырыу. / Тормошта, эштә тап иттереү; осратыу. *Яҙмыш уларҙы осраҡлы рәүештә генә юлыҡтыра: Анна Андреевна һеӊлеһенә тип, яӊылыш Мәскәүҙәге уның фамилиялаштарына — Васяларға барып сыға.* «Совет Башҡортостаны», 1980, 16 август. / *күсм.* Ниндәйҙер хәл-ваҡиғаға осратыу; тарытыу. *Бәләгә юлыҡтырыу.*

**2.** Тәғәйен кешегә алып барып еткереү. *Юлыҡтырһаӊ изге бер хәбәр, боронғонан ҡалған һүҙ йөрөй: ауыҙыӊа бал да май, тиҙәр, ҡандаш туған кеүек уҙ күреп.* Х. Ғиләжев.

**ЮМАҒАРА** *и. диал. кар.* **һар**[1].

**ЮМОР** [*рус.* ⟨ *ингл.*] *и.* **1.** Ниҙеӊдер көлкө итеп һүрәтләнеше, көлкө итеп күрһәтеү оҫталығы. *Юмор менән һөйләү.*

**2.** Тормоштағы берәй төрлө хәл-ваҡиғаныӊ художестволы эҫәрҙә тышҡы яҡтан көлкө итеп биреләше эске бер етдилек, көлкө нәмәгә теләктәшлек менән яраштырып һүрәтләнеше. *Цирк юморы. Юмор һәм сатира.*

**ЮМОРЕСКА** [*рус.*] *и. әҙ.* Юмор менән яҙылған бәләкәй эҫәр. *Музыкаль юмореска. Юмореска уҡыу.*

**ЮМОРИСТ** [*рус.*] *и.* **1.** Юмористик эҫәр авторы йәки башҡарыусыһы.

**2.** *һөйл.* Юмор (1 мәғ.) менән һөйләргә яратыусан кеше.

**ЮМОРИСТИК** *с.* Юмор менән һуғарылған. *Юмористик куплеттар. Юмористик хикәйә.* / Кемде йәки ниҙе лә булһа көлкөлө итеп һүрәтләгән эҫәрҙәрҙән, һүрәттәрҙән һ. б. торған. *Юмористик журнал.*

**ЮМЫРЫСКА** *и. диал.* Кәрешкә.

**ЮНАЙ** *и.* Умыртҡалыҡтың ике яҡ эргәһе.

**ЮНГА** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Матрос эшенә өйрәнеп, каранта йөрөгән үҫмер, шулай уҡ кесе матрос.

**ЮНҒЫ** *и.* Йоморо ағасты юна торған ике һаплы ҡорал. *Юнғы менән юныу.*

**ЮНДЫРЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **юныу.** *Балта менән юндырыу. Көрәк юндырыу.*

**ЮНКЕР** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Революцияға тиклемге Россияла: хәрби училищела уҡыған үҫмер. *Юнкерҙар училищеһы.*

**ЮНЛАУ** *ҡ.* Тирә-яҡлап юныу, юнып яһау (ағасты). *Бер бабай һәнәк юнлап тора.* С. Кулибай.

**ЮНМА** *и. һир.* Ағастың юнылған өлөшө. *Юнмаһы егерме биш аршын бейеклектәге ике солоҡло мөһабәт ҡарағай төбөнә килеп баҫ[тыҡ].* Н. Мусин.

**ЮННАТ** [*рус.*] *и.* Тәбиғәтте өйрәнеү түңәрәгенең ағзаһы; йәш натуралист. *Юннаттар түңәрәге.*

**ЮНЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **юныу 1.** *Юнылған бурәнә.*

**ЮНЫСҠЫ** *и. диал. ҡар.* **юнышҡы.** *Юнысҡылар йышыҡы эсенән борғоланып өҫкә сыға ла еңел генә ергә төшә.* А. Карнай.

**ЮНЫУ** *ҡ.* **1.** Йоҡа итеп, буйҙан-буйға һыҙыра ҡырҡыу. *Ағасты юныу. Балта менән юныу. Бысаҡ менән юныу.* ■ *[Бабай] эре-эре ағастарҙы йығып, .. матур бүрәнәләр юнған.* К. Мәргән. / *күсм.* Һыҙырып туҡмау. *[Үмәр:] Хәҙер мин ҡайтып уның эт һыйын килтереп юнайым әле.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Һыҙыра ҡырҡып, ниҙер яһау. *Көрәк юныу.* ■ *Атаһы Быжырмәргәнгә уҡ юнып биргән* (Әкиәттән).

**ЮНЫШҠЫ** *и.* Йышҡанда, юнғанда сыҡҡан тап. *Юнышҡылар, оҙон аҡ таҫмалар булып, киҫкес аҫтынан һыҙылып сыға.* Б. Бикбай. *Үткер йышҡы шәп йөрөй, бөҙрә юнышҡылар тирә-яҡҡа оса.* Ә. Бикчәнтәев.

**ЮНЫШЫУ** *ҡ.* **1.** *урт. ярҙамл. ҡар.* **юныу**[1]. *Бурәнә юнышыу.*

**2.** Юнып ниҙер яһау. *Шәһит тә, башҡа малайҙар кеүек, бәке менән юнышырға ярата, төрлө нәмә яһай.* Ғ. Шафиков.

**ЮПИТЕР** [*рус.* 〈 *лат.*] (*баш хәреф менән*) *и. астр.* Ҡояш системаһында ҡояштан иҫәпләгәндә бишенсе торған планета.

**ЮР** *с. диал.* Ҙур.

**ЮРАМ** *и. һир.* Юрап әйткән һүҙ. *Халыҡтың бер юрамы ла килеп инә дәфтәргә. Яҙ беренсе емеште ашарға ҡапҡанса әйтә: «Иҫке ҡорһаҡ, яңы аш, сирем-сором тауға ҡас».* Ғ. Хөсәйенов.

**ЮРАМАЛ** *р.* **1.** Эстән уйлаған бер ниәт менән. *Юрамал эшләү.* ■ *Һөмһөрҙөң бисәһе: «Ана, ҡоҙа булған нәмәң еҫкәнеп килеп тә етте! Ҡунаҡ саҡырғанды белеп юрамал йөрөй ул, һалбыр ирен!» — тип пыр туҙып киткән* (Әкиәттән)./Кемдеңдер уй, ҡарашына, теләгенә ҡаршы, хас итеп, ҡарышҡан өҫтөнән. *Сәгиҙә уларҙың һүҙенә ҡарап торманы, юрамал араларына барып ултырҙы.* М. Тажи.

**2.** Бушты ысын иткән булып, ысынға һабыштырып. *Нина юрамал йоҡлап киткән кеше булды.* Б. Бикбай. *Ғәләү ағай өнөндә лә, төшөндә лә күрмәгән бер хәлде юрамал төш итеп һөйләп биргән булды.* С. Кулибай.

**ЮРАТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **юрау 2.** *Төш юратыу.* ● *Уңған кеше эш ырата, уңмағаны төш юрата.* Әйтем.

**ЮРАУ** *ҡ.* **1.** Алдан белгерткән билдә буйынса ни булырын фаразлау, фаразлап әйтеү. *Күңел ниҙер һиҙә, юҡҡа түгелдер .. Ҡотлогужа бабай яҡшыға юрарға тырышты.* Р. Солтангәрәев. *Ҡаиһы саҡта Ғәзимә уҙе йүгереп килеп сыға ла: «Һеҙ бөгөн еләк таба алмайһығыҙ, буш ҡайтаһығыҙ», — тип юҡҡа юрап ҡала.* Ф. Рәхимғолова.

**2.** Төрлө хөрәфәткә таянып, фаразлап әйтеү. *Төш юрау.* ■ *Кеше таш һалып ҡараған, таштар алдаған уны. Кеше кәрт һалып юраған, кәрт тә асмаған юлды.* Р. Ниғмәти.

**ЮРАУСЫ** *и.* Юрау менән шөғөлләнгән кеше. *Төш юраусы.* ■ *Һай, данлыҡлы ҡурайсылар, һоҡландырып уйнаусылар, буласаҡты юраусылар!* (Ҡобайырҙан).

**ЮРҒА 1.** *с.* Юрғалай (1 мәғ.) торған йөрөшлө. *Юрға ат. Юрға булыу.* ■ *Был малайға төкөрөп уҙыр өсөн ҡайҙан алайыҡ аттың юрғаһын.* Ғ. Хәйри.

**2.** *и.* Шундай йөрөшлө ат. *Буҙ юрға. Күк юрға. Туры юрға.* ■ *Төхвәт, уксәләре менән төртә-төртә, юрғаны йәнфарманға саптырҙы.* Й. Солтанов. *Ғәҙебәк Насир мингән ҡара юрға маңлай сәскәйҙәрен йыя алмай* (Халыҡ йырынан). **Йөрөш юрға** гел юрғалай торған ат. **Сапма юрға** һикертеп юрғалай торған ат. **Һибә юрға** юрта барып, юрғалап ала торған ат. **Ығыу юрға** ойотоп ҡына юрғалай торған ат.

**3.** *с. күсм.* Етеҙ, йылдам хәрәкәтле (кешегә һ. б. хәрәкәт итә торған нәмәләргә ҡарата). *Юрға ҡарҙар урын тапмай йылы ҡура эсендә.* Ғ. Ибраһимов.

**ЮРҒАЛАТЫУ** *ҡ.* **1.** Ике уң, ике һул аяҡты бер юлы алдырып атлатыу. *Аҫау ҡола аткайымды юрғалатып үтәмен.* Н. Иҙелбай. *Таңдыса бүргә юрғаға һикереп менеп, иптәш ҡыҙҙары артынан юрғалата.* «Ҡуңыр буға».

**2.** *күсм.* Ваҡ-ваҡ итеп, шәп аҙымлатыу. *«Ҡалай ҡупшы атлай, Фәрхинур апайым кеүек юрғалатып баҫа».* Һ. Дәүләтшина.

**ЮРҒАЛАУ** *ҡ.* **1.** Ике уң, ике һул аяҡты бер юлы алып атлау. *Юрғалап барған ишәк.* ■ *Ерәнсәй ҙә менән ай күрәнсәй юрғалайҙыр тура юл менән* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Ваҡ-ваҡ баҫып, шәп атлау. *Ауыр кәүҙәле атайым йәлп итеп тороп, ишеккә ҡарай юрғаланы.* Ә. Вахитов.

**ЮРҒАН** *и.* Ябынып ятыу өсөн эсенә мамыҡ йәки башҡа нәмә һалып һырылған түшәк ҡаралдыһы. *Мамыҡ юрған. Йоҡа юрған. Ҡорама юрған. Юрған һырыу. Юрған ябыныу.* ■ *Ул [Вәли] сүбәк һалып һырыған ҡырҡ ямаулы иҫке юрған аҫтынан башын ҡалҡытып ҡараны.* С. Ханов. **Буй юрған** *йәки* **түр юрғаны** урындыҡ түренә буйлатып йәйгән тар ғына ҡорама юрған. **Эргә юрған** урындыҡтың түр яҡ башына арҡыры түшәгән тар ғына ҡорама юрған.

**ЮРИДИК** *с.* **1.** Хоҡуҡ нормаларына һәм законларына мөнәсәбәтле. *Юридик дәлил. Юридик*

*нигеҙ.* / Хоҡуҡ фәндәрен өйрәнеүгә мөнәсәбәтле. *Юридик белем. Юридик факультет.*

**2.** Рәсми йәһәттән хоҡуҡлы. *Юридик хужа.*

♦ **Юридик консультация** халыҡҡа хоҡуҡ мәсьәләләре буйынса ярҙам күрһәтеү йәһәтенән адвокаттар коллегияһы тарафынан ойошторолған учреждение.

**ЮРИСДИКЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* **1.** Суд атҡарыу хоҡуғы, хоҡуҡ мәсьәләләрен хәл итеү хоҡуғы.

**2.** Шундай хоҡуҡ таралған өлкә.

**ЮРИСКОНСУЛЬТ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Учреждениеларҙа хоҡуҡ мәсьәләләрен хәл итеү һәм ойошмаларҙа уның мәнфәғәтен яҡлау менән шөғөлләнгән юрист.

**ЮРИСПРУДЕНЦИЯ** [*рус.* ⟨ *лат.*] *и.* Хоҡуҡ хаҡындағы фәндәр. *Юриспруденцияны өйрәнеү.*

**ЮРИСТ** [*рус.* ⟨ *нем.*] *и.* Хоҡуҡ мәсьәләләре, юридик фәндәр буйынса белгес, хоҡуҡ өлкәһендә практик эш алып барыусы.

**ЮРМАЛАУ** *к. диал.* Үрмәләү.

**ЮРМАТЫ** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме.

**ЮРМЫ** *и.* Үгеҙ ҡамыты.

**ЮРМЫЙ** *и.* Түңгәүерҙәргә ингән бер башҡорт ырыуының исеме.

**ЮРТАҠ 1.** *с.* Юртыуға (1 мәғ.) шәп, шәп юртыусан. *Юртаҡ тай. Юртаҡ һәм йүгерек аттарҙың нәүбәттәге ярышын уҙғарыу.*

**2.** *и.* Юртыуға шәп ат. *[Ҡотлобай:] Быйыл һабан туйы шәп буласаҡ! Ат сабышына тирә-яҡтағы бөтә колхоздарҙан да юртаҡтар килтерәләр.* Ш. Янбаев. *Былар менеп юртаҡтарға, теҙелеп-теҙелеп сығып киткәндәр.* Б. Вәлит.

● *Юртаҡ атҡа юл ҡыҫҡа.* Әйтем.

**ЮРТАҠЛАУ** *к.* **1.** Бер яй менән юртыу. *Ғарифтың көр аты .. юлдан юртаҡлай.* Ғ. Хәйри.

**2.** *күсм.* Тегеләй-былай йүгергеләү. *Юртаҡлап йөрөү.*

**ЮРТАУЫЛ** *и. иҫк.* Ғәскәрҙең алдан барған төркөмө; авангард. *Урмандың ҡуйы йүкәлегенә еткәс, юртауылдан берәү килеп, туҡтап торорға ҡушты.* А. Таһиров.

**ЮРТТЫРЫУ** *к.* **1.** *йөкм. кар.* **юртыу** 1. *Атты юрттырыу.*

**2.** Аяҡты етеҙ алып, шәп хәрәкәт итеү (атҡа һәм башҡа хайуанға ҡарата); юртыу. *Ҡашҡа ҡола һыртына сыбыртҡы төшкәнен көтмәне, йәһәт кенә ҡуҙғалып, юрттырып китте.* Ғ. Ғүмәр. / Атта юртыу. *Юрттырып барыу.*

**ЮРТЫУ** *к.* **1.** Аяҡты етеҙ алып, шәп хәрәкәт итеү (атҡа һәм башҡа хайуанға ҡарата). *Бәләкәй генә тау йылғаһы аша һалынған күперҙе үткәс, юртып барған ат аҙымға күсте.* Я. Хамматов. *Ҡойроҡ төрөп, ҡыйыш юртып, Ҡашҡар юл башлап бара.* С. Кулибай. / Атта юрттырыу. *Арҡа еркәйҙәрен юртып үттем ҡыҙыл туры бурыл ат менән* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Шәп-шәп атлап йөрөү.

**ЮРЫЙ** *р. һөйл. кар.* **юрамал.**

**ЮРЫҠ** *и. диал.* Юҫыҡ.

**ЮСТИЦИЯ** [*рус.* ⟨*лат.*] *и.* **1.** Суд эше.

**2.** Суд эштәрен алып барған учреждениелар системаһы, суд эштәре менән шөғөлләнгән дәүләт органдары. *Юстиция министрлығы.*

**ЮҪЫҠ** *и.* **1.** Берәй нәмә менән билдәләнгән тараф; яҡ. *Күҙ юҫығына сығып киттек. Тәүҙә бер һуҡмаҡ һымаҡ ерҙән барғайнык, тора-бара уныһы ла бөттө.* Н. Мусин.

**2.** Ниҙеңдер башҡарылыш, булмыш ыңғайы; яй, йүнәлеш. *Ул [Мәҙинә], түҙемһеҙләнеп, Айҙар тураһында уның [Шәйхулланың] һүҙ ҡуҙғатыуын көтә ине. Бына, ниһәйәт, һүҙ юҫығы шул ыңғайға боролдо.* Ф. Мансуров. *Янһары үҙ юҫығына донъя көтә башлаған* (Әкиәттән).

**3.** Ниҙеңдер яйлы булмышы, тәртибе; йүн. *Эш юҫығына өйрәнеү. // — Ошондай юҫыҡ ир башың менән бисәңде рәнйетәһеңме?* М. Тажи. *// — Һин былай һәйбәт аҡыл өйрәтәһең дә бит, Солтан ағай, һуң. .. Донъя күреп тә өйрәнелмәгән, урыҫса ла юҫыҡ белмәгәс.* С. Кулибай.

**ЮҪЫҠҠА** *р. кар.* **алъюҫыҡҡа.**

**ЮҪЫҠЛАНДЫРЫУ** *к. һир.* Берәй тарафҡа юл, йүнәлеш биреү; йүнәлтеү. *Малды урешкә юҫыҡландырыу.*

**ЮҪЫҠЛАНЫУ** *к. һир.* Берәй тарафҡа юл, йүнәлеш алыу; йүнәлеү. *Өйгә юҫыҡланыу.* ■ *Улар, Максим артынан төшөп, урман эсенә табан юҫыҡланғас, Жакиев төркөмөнөң командирына ниҙер әйтте.* Ә. Хәкимов.

**ЮҪЫҠЛАП** *р.* Тейешле рәүештә; тейешенсә. *Үҙ эшеңде юҫыҡлап белмәү.*

**ЮҪЫҠЛАУ** *к. һир.* **1.** Берәй тарафҡа йүнәлеш алыу; йүнәлеү, юҫыҡланыу. *Оҙаҡламай таң һыҙыла башлар. Ҡайтыр яҡҡа юҫыҡларға кәрәктер.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Берәй тарафҡа йүнәлеш биреү; йүнәлтеү. *Атты ауылға юҫыҡлау.*

**ЮҪЫҠЛЫ** *с. һир.* Тейешле тәртипкә, сифат; рәүешкә ярашлы; йүнле. *Юҫыҡлы егет. // Юҫыҡлы эшләй алмай көн үткәреү.* ■ *Аҙна-ун көн буйы Салихандың ҡулына эш барманы, тамағына ла юҫыҡлы ашаманы.* Ж. Кейекбаев.

**ЮҪЫҠҺЫҘ** *с. һир.* Тейешле тәртипкә, сифат, рәүешкә ярашһыҙ; йүнһеҙ. *Юҫыҡһыҙ әҙәм.*

**ЮХА** *и.* **1.** Халыҡ мифологияһы буйынса, мең йыл йәшәп бик хәйләкәргә әйләнгән, төрлө һүрәткә инә алған йылан. *Уның юха икәнен берәү ҙә белмәй, һис яғы менән кешенән айырылмай, ти. Тик кендеге булмай, шуға ҡарап ҡына юха икәнен беләләр, ти.* Т. Баишев.

**2.** *күсм.* Татлы телле, хәйләкәр кешегә ҡарата. *Миңлекәй ул — ҡала юхаһы, бер әйләнеп, биш түгәныл эсеңә инә.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Юха йылан** *кар.* **йылан**[1] 1.

**ЮХАЛАНЫУ** *к.* Хәйләләп, татлы тел менән йыуып, ярамһаҡланыу. *Шәхми бай бөгөн Ғәләү эргәһендә бейеп кенә йөрөй. «Ҡустым Ғәләү, бөгөн беҙгә ҡунаҡ килә. Һин дә бергә һыйлашырһың.. Мин һине ташламам»,— тип юхалана.* Т. Йәнәби.

**ЮХАЛАУ** *к.* Татлы һүҙ менән алдаштырыу. *Мин төрлөсә юхалап ҡараһам да, ҡабат уны [ҡатынды] һөйләштерә алманым.* Р. Солтангәрәев.

**ЮҺЫҠ** *и. диал.* Юҫыҡ.

**ЮШ**: **юш килеү** (*йәки* **булыу**) тап килеү, дөрөҫ булыу. *Ҡар шунда уҡ иреп, йылғалар ярҙарына һыймай ташты. Ололар маҡтаманы быны, тигенгә түгел, тип ғауғаланы һәм юрауҙары юш килде.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЮША**[1] *и.* Ҡыҙыл, һары, йәшел төҫтәге балсыҡлы тау тоҡомо. *Юша менән асфальтҡа төрлө һүрәт эшләү.*

**ЮША**[2] *и.* Йүшә.

**ЮША**[3] *и. диал.* Мышы.

**ЮШАН**[1] *с.* Йоҡомһорап ҡына йөрөүсән (атҡа ҡарата).

**ЮШАН**[2] *и.* **1.** Бер төптән өйкөм булып сығып, ергә түшәлеп үҫкән алабутаныҡына оҡшаш башлы, япраҡһыҙ үлән (йылҡы яратып ашай).

**2.** Аҡ эрем.

**ЮШАУ** *ҡ.* **1.** Ашап туйғас, йоҡомһорап ял итеү. *Дәү мөгөҙлө үгеҙҙәр ҙә ел ыңғай тороп юшай.* С. Кулибай. *Бәләкәй генә йоморо ай туры атым таң алдынан тороп юшайҙыр* (Халыҡ йырынан).

**2.** Үлән ашау (йылҡы малына ҡарата). *Заятүләк .. атын юшарға ебәрә.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ЮШҠЫН** *и.* **1.** Ҡайнағанда иремәй торған тоҙҙарҙың берәй һауыт эсенә ултырып ҡатҡаны. *Самауырға юшҡын ултырғанға сәйҙең тәме юҡ.* М. Тажи.

**2.** *күсм.* Ниҙәндер күңелдә, хәтерҙә ҡалған ауыр тәьҫир. *Иҙәндә Яппаровтың әҙҙәре тиҙ китте, ә күңелгә һалып ҡалдырған юшҡыны оҙаҡҡа барҙы.* И. Абдуллин.

# Я

**Я**[1] Башҡорт алфавитында ҡырҡ икенсе хәреф.

**Я**[2] *ымл.* Көслө тойғо менән аллаға мөрәжәғәт иткәндә әйтелә. *Я хоҙа!* ■ *[Әбей:] Я рабби, теңкәгә генә тейеп бөттө лә баһа был һуғыш тигән нәмәләре!* З. Биишева.

**ЯБАҒА** *и.* **1.** Йылҡы малының яҙ ҡойған йөнө. *Ҡолон йәше тулып килгәндә ябағаһын ҡоя башлай.* М. Ғөбәйҙуллин. *Бала саҡта ат ябағаһынан туп яһап теңкәбеҙ ҡорой торғайны.* Р. Ғабдрахманов.

**2.** (*йәки* **ябаға тай**) Яҙ тыуған ҡолондоң көҙҙән алып йәше тулғанға тиклемге осоро. *Атыбыҙҙың исеме Ҡолағашҡа ине. Уны атайым бер йәй, бер ҡыш байҙа эшләп, ябаға сағында алып ҡайтҡайны.* С. Кулибай.

● *Ябағаны хурлама, яҙға сыҡһа, тай булыр.* Әйтем.

**ЯБАЙ** *с.* **1.** Башҡаларҙан бер нисек тә айырылып тормаған, ғәҙәти, ғади. *Ябай эш. Ябай кейем. Ябай өй. // Ябай кейенеү.* ■ *[Донъя безҙе] ябай сабый итеп тыуҙырҙы ла һалдат итеп алды ҡосаҡҡа.* Р. Назаров.

**2.** Һәр ваҡыт була, осрай торған, ғәҙәттәге. *Ябай күренеш. Ябай тормош. Ябай хәл.* ■ *Фажиғәле күренеште [һалдаттың] ябай бер ваҡиға итеп кине .. һөйләүе беҙҙең өсөн бик ят тойолдо.* Д. Юлтый.

**3.** Төҙөлөшө, составы ҡатмарлы булмаған. *Ябай матдәләр. Ябай эәбизташ.* ■ *Ябай балсыҡтан арлы-бирле һупалап яһаған был көршәктәрҙә һыу тиҙ боҙола.* З. Биишева. / *махс.* Составы буйынса бер генә төрлө, ҡатмарлы булмаған. *Ябай кәсер. Ябай һан. Ябай һөйләм. Ябай һүҙ.*

**4.** Аңлауға ҡатмарлы, ҡыйын булмаған, үтәүгә, башҡарыуға еңел булған. *Ябай ысул. Ябай эш. Ябай юл менән сиселгән мәсьәлә. Ябай итеп аңлатыу.* ■ *Был минең беренсе тапҡыр иҙән һепереүем ине.. Шундай ябай, көн дә эшләнә торған эш, мин уны эшләгәнем булмаған.* С. Агиш.

**5.** Төп массанан өҫтөн тормаған, дәрәжәһе булмаған. *Ябай халыҡ. Ябай эшсе. Ябай һалдат.* ■ *Хәйләһеҙ бер ҡатлы, уҡый-яҙа белмәгән ябай ауыл ҡатыны .. йылғырлыҡҡа ҡайҙан өйрәнеп бөткән.* Б. Бикбай. / Затһыҙ, сифатһыҙ. *Ял-ҡойроғо тулы тип ябайҙан айғыр алмағыҙ* (Ҡобайырҙан).

**6.** Рәсмилек, эрелек күрһәтмәгән, асыҡ мөнәсәбәтле. *Ябай кеше. // Үҙеңде ябай тотоу.* ■ *[Ҡотлоярҙың] дуҫ кеше кеүек ябай мөғәмәләһе Юлияны бөтөнләй күңелләндерҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**ЯБАЙЛАНЫУ** *ҡ. һөйл.* Мөнәсәбәттә ябайлыҡ күрһәтеү, ябай булыу.

**ЯБАЙЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Ябайға (4 мәғ.) әйләндереү, ябай итеү. *Ябайлаштырып һөйләү. Ябайлаштырып аңлатыу.*

**ЯБАЙЛАШЫУ** *ҡ.* **1.** Ябайға, ғәҙәттәге бер нәмәгә әйләнеү, ябай булыу. *Магазиндың бығаса ят булған ығы-зығыһы ла хәҙер ябайлашты.* С. Агиш.

**2.** Ҡатмарлы хәлдән ябайға (4 мәғ.) әйләнеү. *Эшләү ысулы ябайлашты.*

**ЯБАЙЛЫҠ** *и.* **1.** Айырылып тормаған, ғәҙәттә була торған нәмәгә хас сифат. *Кейемдең ябайлығы. Көндәге тормошҡа хас ябайлыҡ.*

**2.** Ябай (4 мәғ.) булған хәл. *Мәсьәләнең ябайлығы.*

**3.** Ябай (6 мәғ.) булыу сифаты. *Ябайлыҡ, асыҡ һәм хуш күңеллелек, кешелеклелек һыҙаттарын бындағы халыҡта .. бик асыҡ күрергә мөмкин.* К. Мәргән.

**ЯБАҠ** *и. диал.* Ябаға.

**ЯБАЛАҠ** *и.* Йомро башлы, ҙур түңәрәк күҙле, сыбар төҫлө төнгө йыртҡыс ҡош. *Ябалаҡ ҡош маҡтанһа, ярҙан сысҡан алдым, тир* (Ҡобайырҙан). **Аҡ ябалаҡ** аҡ сыбар төҫтәге эре ябалаҡ (ергә оялай). **Бесәй башлы ябалаҡ** һары ҡыҙыл күҙле, оҙон ҡауырһын ҡолаҡлы, ҡарғанан бәләкәйерәк ябалаҡ (ағасҡа оялай). **Өкө ябалағы** *ҡар.* **өкө. Һаҙ ябалағы** һары күҙле, ҡарғанан бәләкәйерәк ябалаҡ (ергә оялай). **Һупай ябалағы** *ҡар.* **һупай.**

♦ **Ябалаҡ ҡар** эре күҙле йомшаҡ ҡар. *Ябалаҡ ҡар.. иренеп, теләр-теләмәҫ кенә яуа.* С. Кулибай.

**ЯБАЛАҠЛАУ** *ҡ.* Эре, йомшаҡ күҙле булыу (ҡарға ҡарата). *Ябалаҡлап яуа ҡарҙар, битемә ҡунып ирей.* Р. Ғарипов.

**ЯБАЛАҠЛЫ** *и.* Уйын исеме (бер бала «ябалаҡ», ҡалғаны «ҡош» була; уйынды алып барыусы: «Көн!» — тиһә, «ябалаҡ» йоҡлай, ә «ҡоштар» уйнай; ул: «Төн!» — тиеүгә «ябалаҡ» һикереп тора, ҡоштар шып туҡтап ҡалырға тейеш; өлгөрмәгәнен «ябалаҡ» ала).

**ЯБАЛДАШ** *с. ҡар.* **япалдаш.**

**ЯБАЛДЫРЫШ** *с. диал.* Япалдаш.

**ЯБАУЫЛ** *и.* Яу менән килгән ғәскәр һәм шул ғәскәрҙең һөжүме. *Ябауыл яһау.* ■ *Ябауыл*

*атлылары яу яулашкан саҡтағыса бер-береһенә булышып, ҡалған мылтыҡтарҙы .. йәһәт кенә йыйҙылар.* Ғ. Ибраһимов.

**ЯБРАИЛ** (*баш хәреф менән*) *и.* Алла һүҙҙәрен яҙып, Мөхәммәткә ишеттереп торған фәрештә. *Ябраил фәрештә.* ■ *Хат арҡыры ҡыҙҙар саҡырған: кил, тиеп. Хат килтергән нурлы ҡыҙҙы уйланым Ябраил тиеп.* Ш. Бабич.

**ЯБЫҒЫУ** (ябыҡ*>*) *к.* Ит-май кәмеп, тән йоҡарыу; ҡаҡсаға әйләнеү; *киреһе* һимереү. *Ауырып ябығыу. Ябығып китеү.* ■ *Мин .. бер ай самаһы ашамай, эсмәй бик нык ябыҡҡайным.* Т. Йәнәби. *Ғишыҡ уттарында яныл-көйөп, ҡауышыр көнөм уйлап ябыҡтым* (Халыҡ йырынан).

**ЯБЫҠ**[1] *с.* **1.** Ябып ҡуйылған, ябылған (асмалы нәмәләргә ҡарата); *киреһе* асыҡ. *Ябыҡ ҡапҡа. Ябыҡ тәҙрә. // Ябыҡ тороу. Ябыҡ тотоу.* ■ *Күтәрмәң бейек, менә алмам, ишегең ябыҡ, керә алмам* (Сеңләүҙән). / Бикле, йоҙаҡлы, эшләмәгән. *Ябыҡ касса. // Клуб ябыҡ тора.* ■ *[Әмирханов] ишектәге ҡатырғаның «Магазин ябыҡ» тигән яғын .. әйләндереп ҡуйҙы.* С. Агиш. / Эш ваҡыты бөткәнде, эш тамамланғанды белдерә. *[Саттар:] Бар, бар, сығығыҙ инде, сығығыҙ! Сход бөттө, сход ябыҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Нәмә менәндер ҡапланған, ябылған; көбө, ябыуы булған. *Ябыҡ лапаҫ. Ябыҡ машина. Ябыҡ орлоҡло үҫемлектәр. Ябыҡ булыу.* ■ *Оҫта һунарсылар, яланға сыҡҡанда, һунар эттәрен ябыҡ нәмәгә тейәп алып сығалар.* Д. Юлтый.

**3.** Бер кешегә лә ҡатнашырға, танышырға рөхсәт ителмәгән; айырым кешеләр өсөн генә тәғәйенле булған. *Ябыҡ йыйылыш. Ябыҡ суд. Мәсьәләне ябыҡ ултырышта ҡарау.* **Ябыҡ хат** *ҡар.* **хат** 1.

**4.** *мед.* Тыштан беленмәгән, асыҡ күренеп, һиҙелеп тормаған. *Туберкулёздың ябыҡ формаһы.*

♦ **Ябыҡ ижек** *ҡар.* **ижек.**

**ЯБЫҠ**[2] *с.* Май ҡатламы булмаған, йоҡа тәнле; *киреһе* һимеҙ. *Ябыҡ мал. Ябыҡ кеше.* ■ *Ашатмаған ирҙең аты һәр саҡ ябыҡ.* Н. Иҙелбай.

**ЯБЫҠЛАУ** *к.* Ябыға төшөү.

**ЯБЫҠЛЫҠ** *и.* Ябыҡ [2] булған хәл. *Әсәйем атайымды ябыҡлығы, мөһабәт, олпат булмауы менән битәрләй торғайны.* З. Биишева.

**ЯБЫҠТЫРЫУ** *к.* Ит-майын кәметеп ябыҡ хәлгә килтереү. *Ашатмай ябыҡтырыу. Малды бикле тотоп ябыҡтырыу.*

**ЯБЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. ҡар.* **ябыу**[1]. *Ябылмай ҡалған ишек. Ситлеккә ябылған ҡош.* ■ *Өйҙәрҙең ҡыйығы шифер менән ябылған.* «Совет Башҡортостаны», 1985, 4 декабрь.

**2.** Эш ваҡыты бөтөү, эштән йәки ғәмәлдә булыуҙан туҡтау (предприятие, учреждение һ. б. ҡарата). *Магазин ябылды.* ■ *[Зөфәр:] Мин дә Йыйыҡтан яңыраҡ ҡайттым. Беҙ уҡыған мәҙрәсә ябылды.* Һ. Дәүләтшина.

**ЯБЫНДЫРЫУ** *к.* Кемдеңдер башына йәки өҫтөнә нимәлер ябыу; ябынырға мәжбүр итеү. *Яулыҡ ябындырыу. Юрған ябындырыу.* ■ *Һоро халат ябындырып ҙур ғына кәүҙәле берәүҙе алып килделәр.* С. Агиш.

**ЯБЫНСА** *и.* Яурынға һалып ҡына кейә торған, башлыҡлы, еңһеҙ йоҡа кейем. *Иңгә ябынса һалыу.* ■ *Ямғыр яуа, башыңа ябынса бөркән.* М. Тажи.

● *Ябынса ҡәҙере ямғырҙа беленер.* Мәҡәл.

**ЯБЫНЫУ** *к.* **1.** Башҡа ябыу, башҡа бәйләү. *Яулыҡ ябыныу.* ■ *Ә яҙ килһә, ап-аҡ шәлен ябынып, баҡсаларҙа сирень ҡуйыра.* Ғ. Сәләм. *Зәлифәкәй ҡыҙҙың йөн яулығын ябынмаған кеше ҡалмаған* (Халыҡ йырынан).

**2.** Өҫкә ябыу, өҫкә ҡаплау. *Ябынып ятыу. Ябынмай йоҡлау.* ■ *Урындыҡта, күмәге бер юрған ябынып, дүрт-биш бала йоҡлай.* З. Биишева.

**ЯБЫРЫЛЫУ** *к.* **1.** Күмәк булып, өйкөлөшөп хәрәкәт итеү, ҡайҙалыр йүнәлеү. *Балалар өҫтәл эргәһенә ябырылды. Халыҡ баҙарға ябырылды. Эшселәр ябырылып эштән сыға.* ■ *Ҡыҙҙар ябырылып эшкә тотондолар.* Ғ. Ғүмәр. / *күсм. һөйл.* Күп, мул булыу, тирә-яҡты ҡаплап алыу. *Ябырылып үҫкән еләк. Урман ауылға ике яҡтан да ябырылып килә.*

**2.** Күп һанда килеп баҫыу, нәмәгәләр күмәкләшеп ташланыу. *Ҡоштар игенгә ябырылды.* ■ *Турғайҙар .. өйөрө менән пырылдап тары өҫтөнә ябырыла.* Ж. Кейекбаев. *Ҡыяр өлгөрҙөмө .. Шаһбал ҡарттың ҡыярына ябырылабыҙ.* А. Гирфанов.

**3.** Күп һанда һөжүм итеү, яу булып ташланыу. *Ябырылып килгән ғәскәр.* ■ *Француз ғәскәренең авангардына ҡаршы казактар, башҡорттар һәм ҡалмыҡтар ябырыла.* Ә. Усманов. *Яу ябырылғанда эймәгән башын халыҡ.* Р. Ниғмәти.

**4.** *күсм.* Ҙур дәғүә, һүҙ менән кемгәләр ныҡ бәйләнеү. *[Сәкинә — Зәлифәгә:] һин минең һәйбәт уҡыуымдан көнләшәһең! .. — тип ябырылған.* Р. Ғабдрахманов. *[Сәхипгәрәй:] Ниңә һин, булмай ҙа булмай, тип тарҡылашаһың? — тип муллаға ябырылды.* И. Ғиззәтуллин.

**ЯБЫРЫЛЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **ябырылыу.** *Ябырылышып килеү.*

**ЯБЫРЫУ** *к.* Өҫтән ҡаплап алыу (күмәк булып, өйкөлөшөп хәрәкәт иткән нәмәләргә ҡарата). *Ер ябырып килеү.* ■ *Ауыл өҫтөн ябырып ҡарғалар, өйөрөлөп уйнай һауала.* Ғ. Амантай.

**ЯБЫУ**[1] (яп*>*) *к.* **1.** Асыҡ торған ишек, тәҙрә кеүек нәмәне кире ҡаплау. *Ҡапҡаны ябыу. Тәҙрәне ябыу. Шкафты ябыу. Һандыҡты ябыу.* ■ *Ҡорбанов, ишекте шартлатҡансы ябып, сығып китте.* Б. Бикбай. / Ҡапҡас, япҡыс менән ҡаплау. *Кәстрүлде ябыу. Банканы ябыу. Мейес ауыҙын ябыу. Һөттө ябып ҡайнатыу.* / Үтеү, инеү мөмкинлеген бөтөрөү. *Бухтаны ябыу. Күпер юлын ябыу.*

**2.** Асылған нәмәне кире ҡаплау, ҡаушырыу. *Китапты ябыу.* ■ *Сәғиҙә көндәлеген япты ла, ҡулын яңағына ҡуйып уйланып ултырҙы.* М. Тажи.

**3.** Нәмәнеңдер эшен туҡтатыу йәки ғәмәлдә булыуын бөтөрөү (предприятие, учреждение, ойошма һ. б. ҡарата). *Институтты ябыу. Кассаны ябыу. Ашхананы иртә япҡандар.* ■ *Магазинды ябып йоҙаҡланылар ҙа пломба һуҡтылар.* С. Агиш. / Барышын туҡтатыу, тамамлау. *Йыйылышты ябыу. Бюро ултырышын ябыу. Конференцияны ябыу.*

4. Индереп биклəү, ҡайҙалыр урынлаштырыу. *Ситлеккə ябыу. Күсте умартаға ябыу. Һугымлыҡты ябып ашатыу.* ■ *Өйөрҙө Һаҙый байҙың ялан кəртəһенə яптылар.* Н. Мусин. **Солоҡ ябыу** *ҡар.* **солоҡ** 1. / Һаҡ аҫтына алыу; ултыртыу. *Төрмəгə ябыу.* ■ *Буләрхан.. Ҡолтубəне хөкөм итеп, зинданға япты, ти* (Әкиəттəн).

5. Өҫтəн ҡаплау, бөркəү. *Башҡа шəл ябыу. Өҫкə юрған ябыу. Йəрəхəткə яра япрағы ябыу. Иген көшөлөн һалам менəн ябыу.* / Ҡоролмаға ҡыйыҡ ҡуйыу, ҡоролманы өҫтəн ҡаплау. *Аҙбар башын ябыу. Ҡалай менəн ябыу. Шифер менəн ябыу. Бөрөп ябыу. Ҡыйыҡлап ябыу.* ■ *Ҡабаланған булып.. ҡыйыҡ япмағанмын икəн был өйгə.* А. Игебаев. / Түшəлеп ҡаплау. *Йылға өҫтөн томан япты. Ер ябып мал килə.* ■ *Мин урамды тотош япҡан ҡаҙ үлəндəренə кинəнеп баҫа-баҫа, ашыҡмай ғына атланым.* З. Биишева. / Ҡаплап ышыҡлап тороу. *Айҙы болот япҡан.* ■ *Оҙон ғына керпек, һикһəн бөртөк, нурлы йөҙҙəреңде ябалыр* (Халыҡ йырынан).

6. Ҡаплап хəрəкəтен, ағышын туҡтатыу. *Газды ябыу. Кранды ябыу. Һыу трассаһын ябыу.*

◆ **Ауыҙын ябыу** *шул уҡ* **ауыҙын ҡаплау** (*ҡар.* **ауыҙ**). **Башын** (*йəки* **түбəһен**) **һалам менəн япҡан** беҙҙең телде аңлай тигəн мəғəнəлə əйтелə. **Үҙе тапҡан, үҙе япҡан** үҙе тапҡан мал, тотонһа, үҙ иркендə тигəн мəғəнəлə əйтелə.

**ЯБЫУ**² *и.* **1.** Өҫкə ябып, ҡаплап ҡуйған нəмə; япма. *Ат ябыуы. Көрəгə ябыуы. Өҫтəл ябыуы. Түшəк ябыуы. Ебəк ябыу.*

**2.** Ҡоролма башы, ҡыйыҡ. *Тимер ябыулы өй. Ябыуһыҙ һарай. Аласыҡтың ябыуын ел осорған.*

**ЯБЫУ** ³ *и.* Һаҡ аҫты, төрмə. *Ябыуға элəгеү.* ■ *Муллайəн хəҙер ябыуҙа ултыра.* Ф. Иҫəнғолов.

**ЯБЫУЛЫ** *с.* **1.** Ябып ҡуйылған, ҡаплаулы. *Ябыулы һауыт.*

**2.** Ябып ҡуйылған, бик аҫтындағы; бикле. *Ябыулы ҡош.* // *Ябыулы ултырыу.*

● *Ябыулы ҡаҙандың тауышы яман.* Мəҡəл.

**ЯБЫУЫС** *и. диал. ҡар.* **ябыу**² 2.

**ЯГУАР** [*рус.* 〈 *нем.*] *и.* Бесəй һымаҡтар ғаилəһенə ҡараған, ҡара сыбар һары төҫтəге эре йыртҡыс хайуан.

**ЯҒА**¹ *и.* **1.** Кейемдең муйын тирəлəй уратып торған өлөшө. *Селтəр яға. Алынмалы яға. Ҡайтармалы яға. Төлкө яғалы тун. Яғаһыҙ күлдəк. Яға ултыртыу.* ■ *[Һыбайлының] асыҡ иҙеүенəн гимнастеркаһының ултыртма яғаһы күренеп тора.* Д. Исламов.

**2.** *эйл. ф.* Ғəҙəттə йылғаға, күлгə һ. б. яҡын тирə-яҡты белдерə; буй, эргə, ян. *Һыу яғаһы.* ■ *Борон Уралдың ҡыбла яғындағы ҙур диңгеҙ яғаһында ҡыҙыл ҡалпаҡ, ҡара ҡалпаҡ, ҡалмыҡ халҡы йəшəгəн* (Легенданан). *Күл яғаһы күк тирəк, күк тирəктең һаны юҡ* (Халыҡ йырынан).

◆ **Яғанан алыу** ниҙер талап итеп, ҡыҫмаҡҡа алыу. **Яғаны биш тотоу** бик тə ҡəнəғəт булыу. *[Яланбикə:] Ярарсəле. Һиңə Айбулат ағайым элəкһə əле, яғаңды биш тотор инең.* Һ. Дəүлəтшина. **Яға сəйнəү** *ҡар.* **сəйнəү**.

● *Ямандан бурыс алһаң, йорт алдында яғаңдан алыр.* Мəҡəл.

**ЯҒА**² *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың түшенə кейə торған шау тəңкə, мəрйендəн ғибəрəт биҙəнеү əйбере; һаҡал. *Мəрйен яға. Тəңкə яға. Яға ҡаптырмаһы. Яға биллеге.* ■ *Алтын ғына алҡа, мəрйен яға тағып сығыр инем муйыныма* (Халыҡ йырынан).

**ЯҒАҠ** *и. диал. ҡар.* **яңаҡ** 1. *Яғаҡ талыу.*

**ЯҒАЛ** *с.* Урыны-урыны менəн əҙ генə икенсе-рəк төҫкə инеп, ала һымаҡ булып торған ат төҫө.

◆ **Яғал ҡош** *ҡар.* **яғылбай.**

**ЯҒАЛАЙ** *р.* Буйлап, буйынан. *Күл яғалай үҫкəн тал.* ■ *[Айһылыу] төш ваҡытында, һарыҡтарын һыулауға туплаған да, үҙе шишмə яғалай елəк-маҙар ҡарап [йөрөгəн].* М. Буранғолов.

**ЯҒАЛАУ** ¹ *ҡ.* **1.** Яғаһынан элəктереү, яғаһына йəбешеү. *Ҡəмəн менəн Сəмəн һикереп торҙолар ҙа, Сəлмəнде яғалап та алдылар, ти* (Әкиəттəн).

**2.** Нимəнеңдер буйынан, эргəһенəн барыу, буйлау; бауырлау. *Яр яғалап барыу.* ■ *Тау яғалап үткəн юл буйлап, һин уҙғайның, иркəм йыр йырлап.* А. Игебаев.

**ЯҒАЛАУ**²: **улан яғалау** *диал.* бала табыу.

**ЯҒАЛАШЫУ** *ҡ.* **1.** Ҡулға-ҡул килеп алышыу, һуғышыу. *Рахмай ауыҙыма ҡундырҙы.. Беҙ яғалашып киттек.* К. Кинйəбулатова.

**2.** Ҡаршы торған көс менəн алышыу, көрəшеү. *Дошман менəн яғалашыу. Ил менəн ил яғалашыу.* ■ *Онотток беҙ артҡа сигенер юлды, яғалаштыҡ дала ҡырында.* Х. Ғилəжев. / Ниндəйҙер эш-хəлгə бирешмəҫкə тырышыу; алышыу, көрəшеү. *Үлем менəн яғалашыу.* ■ *Ҡырҙар буйлап мин йөрөйөм, дауыл менəн яғалашып.* Р. Назаров.

**3.** *күсм.* Бəхəскə килеп тартҡылашыу; ыҙғышыу. *[Туғанов:] Азаматов менəн дə, Ярлыманов менəн дə яғалаша-яғалаша ҡаңғырып бөттөм инде.* Ə. Вəли.

**ЯҒАЛБАЙ** *и. ҡар.* **яғылбай.**

**ЯҒАЛ-ЙОҒАЛ** *с. һөйл.* Ала-сула таптары булған, яғыллы-йоғолло. *Яғал-йоғал булып бысраныу.*

**ЯҒАЛЛАНЫУ** *ҡ.* Ала-сула таплыға əйлəнеү, яғал-йоғал булыу. *Яғалланып бөткəн самауыр.* ■ *Һары мəтегə буялып яғалланған көйө .. Өмөтбай, уның артынан Ҡарасəс килеп инде.* Ғ. Дəүлəтшин.

**ЯҒАЛЫҠ** *и.* Шау тəңкəнəн ғибəрəт күкрəксə рəүешендəге биҙəнеү əйбере.

**ЯҒАУ** *и. диал.* Бағау.

**ЯҒЫЛБАЙ** *и.* Ыласындар ғаилəһенə ҡараған, осло оҙон ҡанатлы, ҡыҫҡараҡ ҡойроҡло, күкшел буҙ һыртлы, ерəнһыу сыбар ҡорһаҡлы йыртҡыс ҡош. *Һауаларҙа осҡан күк яғылбай ҡыялап та оса ҡош күрһə* (Халыҡ йырынан).

**ЯҒЫЛЛЫ-ЙОҒОЛЛО** *с. ҡар.* **яғал-йоғал.**

**ЯҒЫЛЫУ**¹ *ҡ. төш. ҡар.* **яғыу**¹ 1—3. *Яғылған мейес. Яғылмаған өй. Утҡа яғылған сүп-сар.* ■ *Усаҡтарға яғылған ут төтөндəре ерҙе яғалап күсə-күсə күк болотҡа əйлəнде.* Т. Хəйбуллин.

**ЯҒЫЛЫУ** ² *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **яғыу**² 1. *Май яғылған икмəк.*

**2.** Тейеп буялыу; йоғоу. *Бысраҡ яғылыу. Кейемгə буяу яғылған.*

**3.** Яҡын килеп һырыйыу; һырыныу. *Кешегə яғылыу.* / Ҡул менəн тейеү. *Ҡыҙ ҙа бик сая бу-*

лып сыкты, «Ягылма!»— тип. Кәлиҙең кулдарын алып ташланы. И. Ғиззәтуллин.

4. Яҡын килеп тәрәлеү, төкөлөп туктау (ғәҙәттә ағым ыңғайына хәрәкәт иткән нәмәгә ҡарата). *[Малайҙар] кәмәне һаҡ кына ишеп,.. ҡамыш төбөнә барып ягылды.* Ф. Иҫәнғолов.

● *Ысын ҡара китмәҫ, ялған ҡара ягылмаҫ.* Мәҡәл.

**ЯҒЫМЛЫ** *с.* **1.** Йылы тойғо белдергән, иркәләгән. *Ягымлы ҡараш. Ягымлы тауыш. Ягымлы һүҙ. Ягымлы итеп ҡарау.* // *Ягымлы йылмайыу. Ягымлы һөйләшеү.* ■ *Гөләйшә инәйҙең зәңгәрһыу ҙур күҙҙәре ғәжәп яҡын, әсәйемдең һымаҡ ягымлы.* К. Кинйәбулатова. *Хан күҙендә хәйлә сағылды, өндәште ул тыныс, ягымлы.* М. Кәрим. / Күңелгә ятҡан, яҡшы тәьҫир иткән, йомшаҡ. *Яҙҙың ягымлы еле лә, киске тымыҡ һауа ла [Сафаның] .. күңелен аҫа алманылар.* С. Азаматов.

**2.** Кешегә алсаҡ, йомшаҡ һүҙле, мөләйем. *Ягымлы бала.* // *Ягымлы күренеү. Ягымлы тойолоу.* ■ *[Рауза] бигерәк ягымлы ҡыҙ шул ул! Ҡайһы бер башҡа ҡыҙҙар ише ҡылтымбайланып .. бармай.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЯҒЫМЛЫЛЫҠ** *и.* Ягымлы кешегә хас сифат. *Әсәләргә хас ягымлылыҡ.* ■ *Докторҙың ягымлылығы шунда уҡ юҡ булды.* Б. Бикбай.

**ЯҒЫМТАЛ** *с. диал. ҡар.* **ягымлы** 2.

**ЯҒЫМҺЫҘ** *с.* Күңелгә насар тәьҫир иткән, матур, йылы тойғо уятмаған. *[Карағаш] ҡурайҙы алды ла әллә ниндәй, ишетер ҡолаҡҡа ягымһыҙ бер бейеү көйөн тарта башланы, ти* (Әкиәттән).

**ЯҒЫНДЫ** *и.* Һауытҡа яғылып ҡалған нәмә.

**ЯҒЫНЫС** *и.* Һауған саҡта һыйыр имсәген майлау өсөн күнәк ситенә яғып алған май. *Ягыныс һөртөү.*

**ЯҒЫУ**[1] (*яҡ*-) *к.* **1.** (*йәки* **ут яғыу**) Усаҡҡа, мейескә һ. б. яғыулыҡ һалып ут тоҡандырыу. *Ҡаҙан аҫтына ягыу. Мейескә ут ягыу. Икмәк һалырға мейес ягыу.* ■ *Шафиҡ ҡыуыш эшләне, төндә ут ягыу өсөн утын әҙерләне.* Я. Хамматов. *Атаҡайымдың сыуалы яҡҡас йылы ла булһасы* (Сеңләүҙән). / Яҡтылыҡ өсөн ут ҡабыҙыу, тоҡандырыу. *Сыра ягыу.* ■ *Берәү һикереп тороп ишек асты, берәүһе шәм яҡты.* М. Кәрим.

**2.** Ут ярҙамында өй, бүлмәне йылытыу. *Яҡмаған өй.* ■ *Бөгөн [Тимер] өйөнә лә рәтләп яҡмаған.* Б. Бикбай. / Йыуыныу өсөн әҙерләү, йылытыу (мунсаны). *Өшөп ҡайтһаң тип, мунса ла яҡҡайныҡ. Әсәй мунса уҙҙырып йөрөй, йыуынып сығырһың.* Ф. Әсәнов.

**3.** Яғыулыҡ итеп файҙаланыу, утта яндырыу. *Газ ягыу. Күмер ягыу. Утын ягыу.* ■ *Уларҙың [әбей менән бабайҙың] ягыр утындары бөткән. Әбей бәләкәй сана һөйрәгән дә, урманға утынға киткән* (Әкиәттән). / Утҡа ташлап яндырыу. *Буләгеңде утҡа ягам, үҙең миңә булмағас* (Халыҡ йырынан).

**4.** Утта яндырып эшкәртеү; үртәү. *Күмер ягыу.* ■ *Аҡбулат карт гүмер буйы .. туҙ һыҙырған да дегет яҡҡан* (Әкиәттән).

**5.** *күсм.* Ниндәйҙер хис-тойғоно барлыҡҡа килтереү; уятыу. *Шатлығым артты, хисҭәрем ташты, йәшлек дәртен яҡты дуҫтарым.* Я. Ҡолмой.

● *Яңы ҡолаҡсынға ышанып, иҫке ҡолаҡсынды утҡа яҡма.* Мәҡәл.

**ЯҒЫУ**[2] (*яҡ*-) *к.* **1.** Өҫтән буяп һылау; һөртөү. *Битҡә кершән ягыу. Икмәккә бал ягыу.* ■ *[Ғази] сөлмәктән ҡаймаҡ ҡайырып алып, икмәк телеменә яҡты.* Ф. Иҫәнғолов. *Бында ҡыҙҙар .. йөҙҙәренә ҡояш нурын алып ягалар.* Р. Ниғмәти. / *күсм.* Кемгәлер ғәйеп ташлау; яла йәбештереү, тағыу. *Бәлә ягыу.* ■ *Уның [Абдулланың] бөтә эше кешегә яла ягыу, нахаҡтан кеше рәнйетеү.* Я. Хамматов.

**2.** Яҡын килеп тәрәлеү, төкөлөп туктау; һағыу (ғәҙәттә ағым менән хәрәкәт иткән нәмәгә ҡарата). *Һал ярға яҡҡас, ҡырсынға иң тәүҙә бер ҡатын һикереп төштө.* Ж. Кейекбаев.

**3.** *күсм. һөйл.* Күнелдә урын алыу, оҡшау (һүҙ, хәбәргә ҡарата); ятыу. *Күңелгә яҡмаҫ хәбәр.* **Ҡолаҡҡа яғыу** *һөйл. шул уҡ* **ҡолаҡҡа ятыу** (*ҡар.* **ҡолаҡ**).

◆ **Битҡә ҡара яғыу** *шул уҡ* **йөҙгә ҡара яғыу** (*ҡар.* **йөҙ**[1]). **Ҡул яғыу** *ҡар.* **ҡул**[1]. *Кешегә ҡул ягыу.* **Тел яғыу** *шул уҡ* **тел тейҙереү** (*ҡар.* **тел** 2).

**ЯҒЫУЛЫҠ** *и.* Йылылыҡ энергияһы алыу өсөн файҙаланылған нәмәләрҙең дөйөм атамаһы. *Шыйыҡ ягыулыҡ. Дизель ягыулығы.*

**ЯҒЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **яғыу**[1] 1, 2. *Мейес ягышыу.*

**ЯД** [*фарс.*] *и. иҫк. кит.* Иҫ, хәтер. *Ядтан сығарыу. Ядта тотоу.*

□ **Яд итеү** (*йәки* **ҡылыу**) иҫкә төшөрөү, иҫкә алыу. *Йөрәкәйеңдә янған моңло сазың йырлап, яд итәбеҙ исемеңде.* Х. Ғәбитов.

**ЯДКӘР** *и.* Иҫтәлек дәфтәре (*ҡар.* **иҫтәлек**).

**ЯДЛАУ** *к. иҫк. кит.* Иҫкә алыу, хәтергә төшөрөү. *Мәңге онотмам Ашҡаҙар, һаҡмар, Йайыкты, ядларым.* И. Насыри.

**ЯДРО́** [*рус.*] *и.* **1.** *биол.* Күҙәнәктең тығыҙ туҡыманан торған иң мөһим үҙәк өлөшө. *Ядро туҡымаһы. Ядро күҙәнәк йәшәүенә идара итә.* / Ер планетаһының үҙәк өлөшө. *Ер планетаһы ядронан, мантиянан, үрге мантиянан һәм ер ҡабығынан тора.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 23 март.

**2.** (*йәки* **атом ядроһы**) Атомдың протон һәм нейтрондарҙан торған, төп массаһын үҙендә туплаған үҙәк өлөшө. / Һүҙбәйләнештәрҙә: ошо атом ядроһындағы процесстарға, уның энергияһын файҙаланыуға бәйле булғанды белдерә. *Ядро ҡоралы. Ядро реакцияһы. Ядро һугышы.*

**3.** *ҡар.* **йәҙрә.**

**ЯҘ** *и.* Йылдың ҡыш менән йәй араһындағы йылы миҙгеле. *Иртә яҙ. Яҙ айы. Яҙ башы. Яҙға сығыу.* ■ *Яҙ килгәйне, сана ялға китте, юл асылды йүгерек арбаға.* Р. Ниғмәти. / *күсм.* Нәмәнеңдер башланған, сәскә атҡан мәленә ҡарата әйтелә. *Кешелек яҙы. Ғүмер яҙы.*

◆ **Яҙ сәскәһе** *шул уҡ* **кәкүк емеше** (*ҡар.* **кәкүк**).

**ЯҘА** *р.* **1.** Тейешле урындан ситкә. *Яҙа атыу. Яҙа һалыу.* ■ *[Рәйс] тура баҫа алмай, һуҡмаҡтың әле бер, әле икенсе ягына яҙа баҫа.* Н. Мусин.

**2.** Дөрөҫкә, ысынға тура килтермәй, яңылыш, хата. *Яҙа йөрөү. Яҙа әйтеү. Яҙа ишетеү.*

♦ **Яҙа тайыу** *кар.* **тайыу** 1.

**ЯҘА-ЙОҘА** *р.* **1.** Бер тегеләй, бер былай, буталып. *Яҙа-йоҙа баҫыу.*

**2.** Әҙ-әҙ генә, сала-сарпы. *Яҙа-йоҙа ғына күреп ҡалыу. Йаҙа-йоҙа ишетеү.*

**ЯҘАЛАТЫУ** *ҡ.* Яңылыштырыу, буталдырыу. *[Харисов:] Хәжиәхмәт, нимә яҙалатып йөҙәтәһең һин мине. Турыһын ғына әйт.* Т. Килмөхәмәтов.

**ЯҘАТАЙЫМ** *р.* Аңғармаҫтан, иҫләмәй; яңылыш. *[Әбей:] Балаҡайым, берүк уракка тоғонма, яҙатайым бармағыңды ҡырҡып ебәрерһең.* М. Тажи. *Ҡырмыҫҡа бахыр бер соҡорға яҙатайым барып төшкән* (Әкиәттән).

**ЯҘҒЫ** *с.* **1.** Яҙ ваҡытындағы. *Яҙғы боҙ. Яҙғы бысраҡ. Яҙғы сәсеү. Яҙғы эш.* ■ *Ҡарап торһаң яҙғы ташҡынға, күкрәк тулып, йөрәк шашына.* Ғ. Амантай. *Арпа ғына сәсһәң, сәс сиҙәмгә, яҙғы ла ғына монар алмаһын* (Халыҡ йырынан).

**2.** Яҙ сәсеплә торған. *Яҙғы ашлыҡ. Яҙғы бойҙай.*

**ЯҘҒЫЛЫҠ** *и.* Яҙғы көн, яҙғы мәл. *Яҙғылыҡҡа аҙыҡ әҙерләү.*

**ЯҘҒЫРЫУ** *ҡ. диал. ҡар.* **яҙҙырыу**[3].

**ЯҘҒЫҺЫН** *р.* Яҙ көнө. *Брагин яҙғыһын .. һунарға йөрөй торған булған* (Легенданан).

**ЯҘҘЫРЫУ**[1] *ҡ. йөкм. ҡар.* **яҙыу**[1] 1—7. *Ғариза яҙҙырыу. Хат яҙҙырыу. Ҡағыҙ яҙҙырып алыу. Шиғыр яҙҙырыу.*

**ЯҘҘЫРЫУ**[2] *ҡ. йөкм. ҡар.* **яҙыу**[3]. *Йөн яҙҙырыу. Киренән тәнде яҙҙырыу. Май яҙҙырып алыу.*

**ЯҘҘЫРЫУ**[3] *ҡ.* **1.** Нимәнәндер буш ҡалдырыу, мәхрүм итеү. *Малдан яҙҙырыу. Ризыҡтан яҙҙырыу.*

**2.** Кемдеңдер рухи йәки физик сифатын, һәләтен юғалтыуға килтереү, дусар итеү. *Иҫтән яҙҙырыу. Күҙҙән яҙҙырыу. Телдән яҙҙырыу.*

♦ **Эҙ** (*йәки* **юл**) **яҙҙырыу** *шул уҡ* **эҙ йәшереү** (*ҡар.* **эҙ** 1). **Юлдан яҙҙырыу** насар эшкә, яманлыҡҡа күндереү, аҙҙырыу.

● *Алдырып көн яҙҙырыр.* Мәҡәл.

**ЯҘЛАТЫУ** *ҡ.* Яҙ еткереү. *Яҙлатып ҡайтыу.*

**ЯҘЛАУ** *и.* Ыҙманан күсеп, яҙ торған урын. *Яҙлауға күсеү. Яҙлауҙа тороу.*

**ЯҘЛАУЫС** *и.* Яҙғы бәрәс.

**ЯҘЛЫҒЫУ** (яҙлыҡ-) *ҡ.* **1.** Яңылыш ситкә китеү, яҙа юл алыу. *Эҙҙән яҙлығыу. Юлдан яҙлығыу. Яҙлығып йөрөү.* ■ *[Һунарсы:] Был меҫкен [эт] хужаһынан яҙлығып ҡалған, ахыры.* С. Кулибай. *Маяҡһыҙ ҙа яҙлыҡмаҫ Ҡуңыр боға юлы бар.* «Ҡараһаҡал».

**2.** Яңылышып яҙа атыу. *[Сура батыр] тоҫҡап атһа, яҙлыҡмаҫ, мәргәнлектә бер ине.* С. Мифтахов. *Яҙлыҡманы йәш аусы уҡ атыуҙа.* Б. Бикбай. / Тәртибен бутап яңылышыу, буталыу. *Яҙлыға-яҙлыға һөйләү.* ■ *[Егеттәр] таҡмаҡ ыңғайынан яҙлығып, ҡыҙҙың аяғына баҫып бөтә.* Й. Солтанов. *Яҙ яҙлыҡмай. Тағы ла ул килде, атылып сығып буран эсенән.* Р. Назаров.

**3.** Ситкә тайпылыу, тайп килмәй ситтә ҡалыу. *Һыбайлыларҙан яҙлығыу өсөн Батыршалар урман эсләп, бер-ике саҡырым ситкә китә.* Ғ. Хөсәйенов. *[Нәркәс:] Күптәр тоҫҡап атһа ла, барынан да яҙлыҡтым.* «Аҡбуҙат».

**ЯҘЛЫ-КӨҘЛӨ** *р.* Яҙғы һәм көҙгө ваҡытта. *Урамдары яҙлы-көҙлө эт үткеһеҙ бысраҡ була торғайны.* Н. Мусин.

**ЯҘЛЫҠТА** *р.* Яҙ көнө; яҙын. *Яҙлыҡта мал торған урын.*

**ЯҘЛЫҠТЫРЫУ** *ҡ.* Яңылыштырыу, буталдырыу, хата ебәртеү. *Кешене яҙлыҡтырыу.* / *күсм. юкл.* Бөтәһен дә иҫәптә тотҡанды, бутамағанды белдерә. *Көн яҙлыҡтырмай килеп йөрөү.* ■ *[Емеш] уҡытыусы һөйләгән һәр бер һүҙҙе, хатта .. килешеп уҡ бөтмәгәндәрен дә яҙлыҡтырмай отоп алды.* З. Биишева.

♦ **Күҙ яҙлыҡтырыу** *ҡар.* **күҙ. Юл яҙлыҡтырыу** *шул уҡ* **эҙ яҙлыҡтырыу** (*ҡар.* **эҙ** 1). *Урындан күҙ ғалырға ярамай. Күреп ҡалырҙар, һағалағанды һиҙеп, юл яҙлыҡтырырҙар.* Ш. Янбаев.

**ЯҘМА** *и.* **1.** График тамғалар системаһы; яҙыу. *Үҙ яҙмаһы булмаған халыҡ. Шәжәрәне хәҙерге яҙма менән күсереп яҙыу.*

**2.** Ҡағыҙға яҙылған нәмә; яҙыу. *Яҙманы уҡыу.* ■ *Фольклор әҫәрен яҙғанда, мөмкин булһа, бер нисә кеше бер юлы яҙырға кәрәк, һуңынан .. ул яҙманың тулылығын һәм дөрөҫлөгөн тикшерергә кәрәк.* Ғ. Амантай.

**3.** Хәл-ваҡиғаларҙы тасуирлап яҙған әҫәр. *Тарихи яҙма. Юл яҙмаһы.* ■ *Шәжәрә билдәле бер ырыуҙың йәки ҡәбиләнең генеологик яҙмаһы рәүешендә барлыҡҡа килгән.* Ә. Харисов.

**4.** *с. мәғ.* Ҡағыҙға төшкән, яҙылған. *Яҙма комарткы.* ■ *Фольклор борон заманда .. хәҙерге яҙма әҙәбиәт ролен үйнаған.* Ғ. Амантай.

**ЯҘМЫШ** *и.* **1.** (*йәки* **хаҡ яҙмыш**) Дини ҡараш буйынса, алла тарафынан алдан уҡ билдәләнгән күрәсәк; тәҡдир. *Яҙмышҡа күнеү.* ■ *Маңлайыңа яҙған хаҡ яҙмышты һыпырып ташлап булмай кул менән* (Халыҡ йырынан).

**2.** Кешенең йәшәү рәүешен күрһәткән хәл; тормош. *Ауыр яҙмыш. Ил яҙмышы.* ■ *Тора-бара был икәүгә .. йәнә бер нисә ҡаҫҡын килеп ҡушылған. Бер үк яҙмыш, бер үк яфа берләштергән уларҙы.* Н. Иҙелбай. *Беҙ яҡташтар ер полкта инек, бергә бүлдек һалдат яҙмышын.* Ғ. Рамазанов. / Кемдеңдер киләсәге, алдағы тормошо. *Кешелек яҙмышы кешеләр ҡулында.* ■ *[Сәгиҙәнең] яҙмышы хәҙер ике кеше ҡулында ине.* М. Тажи.

**3.** Нәмәнеңдер йәшәү, үҫеү тарихы, уның булмышы, киләсәге. *Ер өҫтөнөң геологик яҙмышы. Халыҡ ижадының яҙмышы. Уңыштың яҙмышы орлоҡҡа бәйләнгән.* ■ *Үҫеп өлгөрмәгән бойҙайҙың яҙмышын ошо рәүешле хәл итеп ҡайттылар.* Т. Йәнәби.

**ЯҘЫҠ**[1] *и.* Ғөрөф-ғәҙәткә һыймаған, ярамаған эш-ҡылыҡ; гөнаһ. *Яҙыҡтан ҡурҡыу. Яҙыҡ булыу. // Яҙыҡ һүҙ һөйләү. Яҙыҡ эш.* ■ *Мөхәббәт яҙыҡ түгел, мөхәббәтһеҙ үйнаш яҙыҡ.* М. Кәрим. *Ҡайҙа юғалды яҙыҡһыҙ аҡ сағым, моңһоҙ сағым.* Ш. Бабич.

**ЯҘЫҠ**[2] *с.* Баш-башы киреңкә бөгөлгән (кәкре нәмәләргә ҡарата); һоноҡ. *Яҙыҡ дуға. Яҙыҡ салғы. Ай яҙыҡта ямғыр булмаҫ.* Һынамыш.

♦ **Яҙыҡ маңлай** һөмһөрө ҡойолоп тормаған асыҡ йөҙлө, алсаҡ кешегә ҡарата әйтелә.

**ЯҘЫҠЛЫ** *с.* Ғәйепле, гөнаһлы. *Яҙыҡлы булыу.*

● *Урлаған бер яҙыклы, урлатҡан мең яҙыклы.* Мәҡәл.

**ЯҘЫЛДЫРЫУ** *к. кар.* **яҙыу**[3] 1. *Бәләнән арыныу кыуанысы .. [егеттең] быуындарын яҙылдырып, бөтә тәне-рухына аңлағыһыҙ көс биреп тарала.* Ә. Хәкимов.

**ЯҘЫЛЫУ**[1] *к.* **1.** *төш. кар.* **яҙыу**[1] 1—7. *Ашығыс яҙылған телмәр. Башкортса яҙылған китап. Ҡәләм менән яҙылған хат. Пластинкаға яҙылған йыр. Ташҡа соҡоп яҙылған яҙыу.*

**2.** Нимәнеңдер иҫәбенә, һанына инеү, ҡайҙалыр үҙеңде яҙҙырыу. *Кооперативҡа яҙылыу. Эшкә яҙылыу.* ■ *[Тимербулат] уйынан: «Иртәгә үк союзға яҙылам», тип карар итеп ҡуйҙы.* Һ. Дәүләтшина. *[Зилский] гүмерендә һабан артынан йөрөп, һабан башы тотмаһа ла, .. крәҫтиән булып яҙылды.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Ваҡытлы матбуғатты йәки берәй баҫма әҫәрҙе билдәле бер ваҡытта килтереү шарты менән алдан хаҡ түләү. *Газетаға яҙылыу. Журналға яҙылыу. Пушкин әҫәрҙәре йыйынтығына яҙылыу.*

**4.** *дини* Илаһи көс, алла тарафынан билдәләнеү (кешенең яҙмышы, күрәсәгенә ҡарата). *Тәҡдирҙә яҙылған күрәсәк.*

**ЯҘЫЛЫУ**[2] *к.* **1.** Бөкләнгән, бөгәрләнгән, йыйырылған хәлдән тигеҙ, төҙ хәлгә килеү. *Маңлай яҙылды.* ■ *Һулаҡай терһәк мылтыҡ күтәреп кәкрәйгән, яҙылмай.* А. Таһиров. *Ҡолсобай ҡапыл хәлһеҙләнде,.. йөҙроктары үҙенән-үҙе яҙылды.* Я. Хамматов. / Ҡатып, ойоп киткән хәлдән быуын йомшап, иркенләү. *Эшләгәс, тән яҙылып китте. / күсм.* Иркенлек һиҙеү, иркенләү. *Яҙылып ултырып һөйләшеү.*

**2.** Төйөрләнгән, ойошҡан хәлдән таралыу. *Ҡамырҙы төйөрө яҙылғансы туҡыу. / күсм. һөйл.* Таралған һымаҡ булып кәмеү; баҫылыу. *Вәлимәнең асыуы яҙылманы.* Һ. Дәүләтшина. *Ай-һай ҙа ғына тимәй көй табылмай, ах-вах итмәй хәсрәт яҙылмай* (Халыҡ йырынан).

**ЯҘЫЛЫУ**[3] *к.* Ауырыуҙан арынып, әҙерәк шәбәйеү. *[Карт] яҙылып бер аҙ йөрөһә лә, мандымаңы, яҙға табан үлеп ҡуйҙы.* Ж. Кейекбаев.

**ЯҘЫЛЫШ** *и.* Нәмәнеңдер яҙылыу рәүеше, яҙыуҙағы бирелеше. *Ялгауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы.*

**ЯҘЫЛЫШЫУ** *к.* Никахты теркәү, загсҡа инеү. *[Харис:] Минең ҡатыным Мәҙинә ошо була инде. Беҙ әле генә яҙылышып ҡайттыҡ.* Ш. Янбаев.

**ЯҘЫМ**[1] *и.* Башҡа килгән бәлә-ҡаза, бәхетһеҙлек. *[Ҡарас батыр:] Миңә бер-бер яҙым булһа, кәүҙәмде дошман ҡулына бирергә тырышмағыҙ* (Әкиәттән).

**ЯҘЫМ**[2] *с.* Һан менән килеп, майҙың бер самалағы күләмен белдерә. *Бер яҙым май.*

**ЯҘЫН**[1] *р.* Яҙ көнө, яҙ ваҡытында. *Яҙын ғына муйыл сәскә ата, һандуғаскай килеп ҡунһын, тип* (Халыҡ йырынан).

**ЯҘЫН**[2] *с. диал.* Яңылыш, хата. *Яҙын юл менән барыу.*

**ЯҘЫНҠЫ** *с.* Тейешле кимәлдә бөгөлмәгән, яҙыҡ. *Яҙынҡы дуға. Яҙынҡы көйәнтә.*

**ЯҘЫНЫУ** *к.* Үҙ алдыңа ниҙер яҙыу. *Яҙынып ултырыу.* ■ *[Юлдаш әбей:] Бик күп яҙынаһың, балам. Күҙ нурыңды ашап бөтә инде был аҡка теклэп ултырыуҙарың.* Һ. Дәүләтшина.

**ЯҘЫРТЫН** *р. диал.* Яҙа. *Яҙыртын йөрөү. Яҙыртын баҫып аяҡты кимәлйетеү.*

**ЯҘЫУ**[1] *к.* **1.** Ҡағыҙ йәки башҡа нәмәгә һан, хәреф, һүҙ һ. б. төрлө график тамғалар төшөрөү. *Асыҡ итеп яҙыу. Дөрөҫ яҙыу. Ҡара менән яҙыу. Нота яҙыу. Ташҡа яҙыу. Күсереп яҙыу. Яҙырға өйрәнеү.* ■ *Хәлиулла справкаларҙы әйләндереп-әйләндереп ҡараны: — Бороңго гөбөрнатор писере кеүек нисек һырландырып яҙған.* И. Ғиззәтуллин. *Алмас тимер менән яҙалар икән көмөш йөҙөктәрҙең каштарын* (Халыҡ йырынан). / Ошо эшкә яраҡлы булыу (ҡәләм, перо һ. б. ҡарата). *Перо матур яҙа.* ■ *Ҡәләмдәрем яҙа алмай, күңелдәрем тулғанға* (Халыҡ йырынан).

**2.** Ҡулдан йәки баҫма, һыҙма юл менән график тамғаларҙы теҙеп теркәү. *Дәфтәргә яҙып ҡуйыу. Һөйләгәндә яҙып барыу.* ■ *[Оҫтабикә:] Ике фәрештә .. һәр кемдең ни эшләгәнен яҙып торор.* Б. Ишемғол.

**3.** Яҙма әйбер төҙөү, уй-фекерҙе ҡағыҙға төшөрөү. *Доклад яҙыу. Көндәлек яҙыу. Ғариза яҙыу.* ■ *Блиндажда Шайморатов .. приговорҙар яҙҙы кемгәлер!* Б. Бикбай. *Табаҡ та ғына табаҡ ай аҡ ҡағыҙ Буранбайҙың яҙған хаттары* (Халыҡ йырынан). / Яҙма рәүештә кемгә йәки нәмәгәлер мөрәжәғәт итеү. *Газетаға яҙыу. Өлкәгә яҙыу. Юғары органдарға яҙыу. Ҡала прокуратураһына яҙыу.*

**4.** Нимәнеңдер иҫәбенә индереп исемлеккә теркәү, алыу. *Үҙешмәкәр түңәрәккә яҙыу. Эшкә яҙыу.* ■ *[Тимербулат:] Командир ағай, мине лә отрядҡа яҙ.* Һ. Дәүләтшина.

**5.** Нимәнелер алыу, биреү йәки берәйһенең исеменә күсереү һ. б. тураһында документ төҙөү. *Малды балаға яҙыу. Мөлкәтте яҙып сығыу. Эш хаҡы яҙыу.* ■ *Идараға барҙыҡ. Беҙгә ике килограмм отход яҙып бирҙеләр.* К. Кинйәбулатова. *[Зилский:] Өмөтбай ҡайҙа? Уның һалымға инә торған нәмәләрен яҙып алырға кәрәк.* Ғ. Дәүләтшин.

**6.** Ниндәй ҙә булһа әҫәр төҙөү, ижад итеү. *Хикәйә яҙыу. Шиғыр яҙыу.* ■ *Горький яҙған дауыл ҡошо кеүек, берәү яуға уктай атылды. Был Ҡусимов ине.* Р. Ниғмәти. *Ә ҡасан һуң колхоздарға тиңдәш шиғыр яҙыр шағирҙар.* Ғ. Сәләм. *Быны бәйет итеп яҙҙым йөрәктәрем янғанға* (Бәйеттән). / Музыкаль әҫәр ижад итеү. *Көй яҙыу. Опера яҙыу.*

**7.** Махсус аппарат ярҙамында тауышты пластинкаға, пленкаға төшөрөү, алыу. *Концертты яҙыу. Магнитофонға яҙыу.*

**8.** *дини* Күрәсәкте алдан билдәләү, хәл итеү (йәнәһе уны илаһи көс — алла эшләй). *Хаҡ яҙғанды күреү. Хоҙай яҙмаған эш.* ■ *[Ныязгол:] Алла яҙғанын күреп, ситкә сәселгән ризыҡты ейеп ҡайттым.* Һ. Дәүләтшина. / Яҙмышҡа тап килеү, өлөшкә тейеү. *Ризыҡҡа яҙғанды ейеү. Яҙған булһа, ҡайтырбыҙ. Күрешергә яҙмаған икән.* ■ *Ризыҡ кушкан ерҙә йөрөрһөң, тупраҡ яҙған ерҙә ҡалырһың* (Халыҡ йырынан).

◆ **Маңлайға яҙған** *кар.* **маңлай. Туҙға яҙ-**

маған *кар.* **туҙ. Яҙһын** теләк теләгәндә әйтелә. *Имен йөрөп ҡайтырға яҙһын.* ■ *[Алпамыша:] Сибәрлегең артһын, һылыу, ҡара ҡашың, зифа буйың һөйгәнеңә яҙһын, һылыу.* «Алпамыша».

**ЯҘЫУ** [2] *и.* **1.** Махсус ҡорал ярҙамында ҡағыҙ йәки башҡа нәмәгә график тамғалар төшөрөү эше, шөғөлө. *Яҙыу булмаһа, кешеләр ғалимға, наҙанға ла бүленмәҫ ине.* С. Агиш. **Яҙыу эше** 1) физик эштән айырыу маҡсатында яҙыу-һыҙыу эшенә, аҡыл хеҙмәтенә әйтелә. *Яҙыу эшендә эшләү;* 2) әҫәр ижад итеү эше. / Ошо шөғөл күнекмәһе. *Яҙыу дәресе. Яҙыу дәфтәре.* ■ *Күберәк яҙышырға тура килмәгәнгә [Диләнең] яҙыуында хаталар бар.* Һ. Дәүләтшина. / Ошо шөғөлдөң кемгәлер хас рәүеше; ҡул. *Яҙыуы матур түгел. Үҙ яҙыуын үҙе танымаған кеше.*

**2.** Нәмәлер яҙылған, һүҙе, хәбәре булған ҡағыҙ. *Яҙыу биреү.* ■ *Сәғиҙә [Зыяға] ашарға әҙерләп өҫтәлгә ҡуйҙы ла, яҙыу ҡалдырып китте.* М. Тажи. *[Хәйерсе һалдатҡа:] Эй, ағай, бер һыныҡ икмәк бирһәң, яҙыуыңды уҡып бирәм,— ти* (Әкиәттән). / *диал.* Газета, китап бите. *Яҙыуға төрөү.* **Яҙыу таныу** уҡый-яҙа белеү. *Күҙҙәре яҙыу таныған ауыл байҙарының барыһы ла йорт үҙәгендәге мәҙрәсәлә .. уҡығандар.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Нәмәлер алыу, эшләүгә һ. б. рәсми документ көсөндәге ҡағыҙ. *Юғарынан килгән яҙыу. Яҙыу яҙҙырып алыу.* ■ *[Бәҙерғол:] Йәмәғәт, губерна ҡағыҙын шиккә алмайыҡ әле. Мөһөрлө, ҡул тамғалы яҙыу.* Г. Хөсәйенов.

**4.** Яҙғанда ҡулланылған график тамғалар системаһы. *Ғәрәп яҙыуы. Латин яҙыуы.* ■ *Башҡорт тамғалары уҙҙәренең рәүештәре, һыҙылыштары менән .. руни яҙыуҙарын хәтерләтә.* «Совет Башҡортостаны», 1968, 17 декабрь.

● *Боҙ өҫтөндә яҙыу тормаҫ.* Мәҡәл.

**ЯҘЫУ** [3] *ҡ.* **1.** Бөкләнгән, йомолған, йыйырылған хәлдән төҙ, тигеҙ хәлгә ҡайтарыу, турайтыу. *Аяҡты яҙыу. Бармаҡтарҙы яҙыу. Билде яҙыу.* ■ *Байрас усын яҙып, йәтешләп өҫтәлгә һалды.* З. Биишева. / Ҡатып, ойоп киткән хәлдән йомшаҡ, иркен хәлгә килтереү. *Кирелеп, тәнде яҙыу.* ■ *Футболсылар уйын алдынан аяҡ-ҡулды яҙыр өсөн йәшел яланға йүгереп сыҡты.* Ф. Иҫәнғолов. / *күсм.* Булған көскә ирек биреү. *Ҡулың эшкә теймәҫ борон ауыр тимә, беләгеңдең көсөн яҙып һынап ҡара.* М. Тажи.

**2.** Төйөрләнгән, ойошҡан хәлдән аралап таратыу; тетеү. *Йөн яҙыу.* ■ *Әсегән ҡымыҙҙың эрпеһен яҙыу ауыр була.* М. Ғөбәйҙуллин. **Сәс яҙыу** сәс тарау. / *күсм. һөйл.* Көслө хис-тойғоно баҫыу, таратыу. *Асыуҙы яҙыу. Ҡайғыны яҙыу.*

**3.** Бешеп, туҡып айран, май яһау. *Айран яҙып эсеү.* ■ *Яңы яҙған май туҡлыҡлы ла, үҙе тәмле лә.* Ғ. Амантай.

♦ **Бил яҙмай** бик тырышып, баш күтәрмәй (эшләүгә ҡарата).

**ЯҘЫУ** [4] *ҡ.* **1.** Нимәнәндер буш ҡалыу, мәхрүм булыу. *Малдан яҙыу. Ер-һыуҙан яҙыу. Ризыҡтан яҙыу.* ■ *Ҡәләм алһам, төшөп китә ҡулдарымдан, илайым мин яҙырмын тип моңдарымдан.* Н. Нәжми. *Ул [Ҡолморҙа] аттан яҙып ҡалғас, йәйәүләп ҡайта.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Ниндәйҙер рухи йәки физик сифатты, һәләтте юғалтыу. *Аҡылдан яҙыу. Иҫтән яҙыу. Күҙҙән яҙыу. Тамаҡтан яҙыу. Телдән яҙыу.* ■ *[Яуынбай ҡайғыһынан] әсәһе аяғынан йығылды. Ашау-эсеүҙән яҙҙы.* Ш. Шәһәр. *Унан һис белмәйем ни булғанын, һуштан яҙып ятып ҡалғанмын.* С. Кулибай.

**3.** Нимәнеңдер тейешле тәртибенән сығыу; яңылышыу. *[Ныязғол] бая уҡ иҫәбенән яҙған һиҫбеһенең дә .. осона сыға алманы.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Күҙ яҙыу** *кар.* **күҙ. Юл** (*йәки* **эҙ**) **яҙыу** кемдән йәки нимәнәндер яңылыш тайпылып, яҙа китеү. *Иптәштәрҙән юл яҙыу.* ■ *Ҡараңғы төн, һибәләп яуған ямғыр арҡаһында аҡтар минән эҙ яҙҙы.* Ғ. Ғүмәр. **Юлдан яҙыу** *кар.* **юл** [1].

**ЯҘЫУ** [5] *ярҙ. ҡ.* *-ға, -ғй* формаһындағы хәл ҡылымға эйәреп, эш-хәлдең саҡ ҡына булмай ҡалыуын белдерә. *Йығыла яҙыу. Илай яҙыу. Ергә тейә яҙыу.* ■ *Эй баралар былар, эй баралар, ти, диңгеҙҙең аръяғына сығып етә яҙалар, ти* (Әкиәттән).

**ЯҘЫУСЫ** *и.* Әҙәби әҫәр яҙыу менән шөғөлләнгән кеше. *Йәш яҙыусы. Башҡорт яҙыусыһы. Танылған яҙыусы.*

**ЯҘЫУСЫЛЫҠ** *и.* Ижад итеү эше, яҙыусы хеҙмәте. *Яҙыусылыҡ эше — ижад эше, ул яңы .. әҫәр яҙыу тигән һүҙ.* Ә. Вәли.

**ЯҘЫУ-ҺЫҘЫУ** *и. йыйн.* Төрлө яҙыу эше. *Яҙыу-һыҙыу менән булышыу.*

**ЯҘЫШЫУ** *ҡ.* **1.** *урт. кар.* **яҙыу** [1] 2, 3, 6. *Лозунг яҙышыу. Йыр яҙышыу.*

**2.** Яҙыу-һыҙыу менән шөғөлләнеү. *Яҙышып ултырыу.*

**3.** Бер-береңә нимәлер яҙыу. *Хат яҙышыу.* ■ *[Ҡыҙҙар] альбомдарына иҫтәлектәр яҙышты.* М. Тажи. / Үҙ-ара һүҙ беркеткән яҙма төҙөү. *Договор яҙышыу.*

**4.** Ижад итеү, ижади эш менән шөғөлләнеү. *[Н. Ҡәрип:] «Һеҙҙе яҙыша тип әйтәләр, ниңә беҙҙең журналға бер ни ҙә алып килмәйһегеҙ?» — тип һораны.* З. Биишева.

**ЯЗА** [*гәр.* жәза] *и.* Ҡылған енәйәт, ғәйеп өсөн ҡулланылған сара. *Ҡаты яза. Тән язаһы. Үлем язаһы. Язаға тарттырыу.* ■ *[Колчактың] яза фирҡәләренән ҡасып, урман араһында йәшәүҙең өс айын тултырып килә инем.* Б. Ишемғол. *Туҙемгол баяғы әбейҙән: «Дейеүгә ниндәй яза бирәбеҙ?» — тип һораған. Әбей әйткән: «Тәүҙә мин эшләгән эште эшләтәйек, шунан тураҡлап ташларбыҙ»,— тигән* (Әкиәттән).

**ЯЗАЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. кар.* **язалау.**

**ЯЗАЛАУ** *ҡ.* Тән йәки йән ғазабы сараларын ҡулланыу; яза биреү. *Язалап үлтереү.* ■ *[Абдрахманды] тотоп алғандар, һуҡтырғандар, көнө буйы язалағандар.* Ә. Вахитов.

**ЯЗВА** [*рус.*] *и.* Эс-ҡарындағы лайлалы тиресәнең шешеп йәрәхәткә әйләнеүе. *Ашҡаҙан язваһы.* ■ *Язва күберәк 20-30 йәштәге кешеләрҙә осрай. Ауырыуҙың төп билдәһе — эс ауыртыу.* В. Ғүмәров.

**ЯЙ** [1] *и.* **1.** Нимәлер башҡарыуға тейеш мәл; уңай. *Яйы сыҡҡанда.* ■ *Ике күҙе һаман ҡыҙҙа [Ниғмәттең], яй килгән ҡайын өҙөк-өҙөк һүҙ ҡушҡылай.* Б. Бикбай. *Яйын тура килтереп, бат-*

*ша кыҙы Көмөшбайҙың балдағын урлап алған* (Әкиәттән). / Нимәнелер эшләү, тормошҡа ашырыу юлы; әмәл. *Яйын эҙләү.* ■ *Һиҙеп торам, [Вәсиләнең] ниҙер әйткеһе килә лә, тик яйын таба алмай.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Кешенең нимәгәлер булған ихтыяры, теләге (ғәҙәттә уға ирек ҡуйғанда, уны сикләмәгәндә әйтелә). *Кешене үҙ яйына ҡуйыу. Үҙ яйыңа йөрөү. Үҙ яйыңды ҡарау.* ■ *[Урал — Шүлгәнгә:] Ат һайланың — яй ҡуйҙым, дан эҙләргә теләнең — теләгеңә юл ҡуйҙым.* «Урал батыр». **Яйға килеү** *шул уҡ* **ыңғайға килеү** (*кар.* **ыңғай** II 2). **Яйына тороу** теләгенә ҡаршы килмәй, юл ҡуйыу. / Кемдеңдер күңел торошо, кәйефе. *[Хан] иҫәнләшеп бары менән күрешеп сыҡты, һәр беренең хәлен, яйын белешеп сыҡты.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**3.** Нимәнеңдер тейешле тәртибе, көйө. *Эште яйға һалыу. Эштең яйын табыу.* ■ *Хайран ғына егет вайран була донъяларҙың яйы юҡ өсөн* (Халыҡ йырынан).

● *Игендең яйын иккән белер, арбаның яйын еккән белер.* Мәҡәл.

**ЯЙ** [2] *и.* Урын, ер. *Урман, туғай, ҡырыңды баяр тигән дошмандың заводына яй иттең.* «Мәргән менән Маян».

**ЯЙ** [3] *с.* Ғәҙәттәгенән әкрен. *Яй ағышлы йылға. Яй хәрәкәт. // Яй ағыу. Яй әйләнеү.* / Ашыҡмай, үҙ көйөнә генә эшләгән, йөрөгән һ. б.; ҡабаланмаған. *Яй кеше. // Яй йөрөү. Яй эшләү.* ■ *Сәйҙел дә шул, Зәйнәбен оҙатҡас, ҡалаға атланы яй ғына.* Ғ. Сәләм.

**ЯЙАҠ** *с. иҫк.* Йәйәүле.

**ЯЙҘАҠ** *с.* **1.** Эйәр һалынмаған, эйәрһеҙ. *Яйҙаҡ ат. // Яйҙаҡ менеү.* ■ *Ике ат әҙерләп алып, яйҙаҡ ҡына менеп, Малаяҙ яғына саптылар.* И. Насыри. *Ат ялына яйҙаҡ көйө йәбешеп, елермен мин алһыу офоҡҡа.* Р. Бикбаев.

**2.** *һөйл.* Итһеҙ, ит һалынмаған (ашҡа ҡарата); буш. *Яйҙаҡ һалма.* ■ *Күп тә үтмәне, әсәһе яйҙаҡ ашты бешереп тә алды.* К. Даян.

**ЯЙҘАҠЛАУ** *к.* Эйәрһеҙ, яйҙаҡ менеү. *[Айрас] айғырға яйҙаҡлап ҡына атланды ла .. сапты.* Ш. Насыров.

**ЯЙКАЛЙЫУ** *к. диал.* Мыштырлау.

**ЯЙКАРЫУ** *к. иҫк.* Тар-мар итеү; ҡыйратыу, емереү.

**ЯЙЛА** *и.* Киң, тигеҙ тау өҫтө. *Борон заманда .. ҡаялы тау өҫтөндәге киң яйлала кескәй генә бер ауыл булған.* З. Биишева.

**ЯЙЛАҠ** *с. кар.* **яйҙаҡ** 1. *Утар эргәһенә атын яйлаҡ менгән берәү килеп туҡтаны.* Н. Мусин.

**ЯЙЛАМА** *и. һөйл. кар.* **ҡулайлама.**

**ЯЙЛАНЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **яйлау**[1] 2. *Электр менән эшләүгә яйланған машина.*

**2.** Яйға һалыныу, яҡшырыу. *Иңе килһә, буйы тар тигәндәй, эштең бер яғы шәп кенә барһа, икенсе яғы яйланып етмәй.* Ғ. Ибраһимов.

**ЯЙЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **яйлау**[2]. *Аҙымды яйлатыу.*

**ЯЙЛАУ** [1] *к.* **1.** Уңайлы, яйлы итеү; йәтешләү. *«Һөйлә!» — тине миңә Сыртланов. Үҙе тыңлар өсөн яйлабыраҡ, трибунаға боролоп ултырҙы.* С. Агиш.

**2.** Билдәле бер ҡулайға, яйға килтереү; йәтешләү, иплләү. *[Тимерғотло] йөҙ һикһән аҙаматын һайлап алды, яу ҡоралын барын да яйлап алды.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**3.** Яйға, юлға һалыу, йүнгә килтереү; көйләү, йүнләү. *Тормошто яйлап ебәреү. Эште яйлау.* ■ *[Ҡотлояр:] һин ҡыҙҙы алып китеүеңдә бел. Ҡалғанын беҙ үҙебеҙ бында яйларбыҙ.* Һ. Дәүләтшина. / Төрлө юл менән күңелен табыу, ипкә килтереү; көйләү. *Кешене яйлау.* ■ *Заһит, имеш, ревизорҙы яйлай, һыйыр һөтө менән йыуа, тауыҡ ите менән майлай.* Т. Арслан.

**ЯЙЛАУ** [2] *к.* Ашыҡмай, ғәҙәттәгенән аҡрын ҡуҙғалыу. *Яйлап ҡайтыу. Яйлап йөрөү.* ■ *Закир айранды .. яйлап, йотомлап ҡына эсеп бөттө.* З. Биишева.

● *Ашыҡҡан үҙен бөтөрөр, яйлаған эшен бөтөрөр.* Мәҡәл.

**ЯЙЛАШЫУ** *к.* Нимәгәлер өйрәнеп, ҡулайлашыу; яраҡлашыу. *Яңы шартҡа яйлашыу.* ■ *Әхмәҙулла Исламович бындағы тәртиптәргә күптән уҡ яйлашып, күнегеп бөткәйне булһа кәрәк.* Ф. Әсәнов.

**ЯЙЛЫ** *с.* **1.** Файҙаланыу өсөн уңайлы, йәтеш булған; ҡулайлы. *Яйлы көрәк. Яйлы квартира. Яйлы итеп тотоу.* ■ *Улар яйлы урын һайлап, бер-ике туңәрәк яһап ураныллар.* С. Кулибай.

**2.** Нимәлер өсөн яҡшы, уңайлы булған, тура килеп торған. *Яйлы ваҡыт. // Яйлы килеп сығыу.* ■ *Айбулат һөйләшергә яйлы һүҙҙәр эҙләне.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Юлға һалынған, көйлө. *Яйлы тормош. // Эш яйлы бара.* ■ *Ҡыйыуланып китә Төлкө: «Әһә»,— ти ул,— «эш яйлы».* Х. Кәрим.

**ЯЙМАН** [1]: **яйманда ятыу** *диал.* Ауырыу, сирләп ятыу.

**ЯЙМАН** [2] *с. диал.* Әкрен, яй. *Яйман ғына атлау.*

**ЯЙНАУ** *к.* Балҡыу, ялтлау. *Нур яйнаһын баштар өҫтөндә.* Ш. Бабич.

**ЯЙПЫ** *с. диал.* Йәйелеп ятҡан, киң. *Яйпы ялан.*

**ЯЙПЫС** *и.* Яҡшы тоҡомло һарыҡ.

**ЯЙРА** *и. диал. кар.* **үҙәк** 6. *[Ярмат] Ирәндектең тәрән яйраһына инеп юғала* (Легенданан).

**ЯЙРАН** *и. кар.* **йәйрән.**

**ЯЙҺЫҘ** *с.* **1.** Файҙаланыу өсөн уңайһыҙ булған; ҡулайһыҙ, ипһеҙ. *Яйһыҙ балта. Яйһыҙ урын. Яйһыҙ булыу.* ■ *Барыр юл бик тар ҙа, яйһыҙ ҙа икән* (Әкиәттән).

**2.** Ниндәйҙер эш өсөн уңайлы булмаған, ҡамасау булған. *Яйһыҙ ваҡытта килеү.*

**3.** *күсм.* Күңелгә ҡыйын; уңайһыҙ. *Яйһыҙ хәлгә ҡалыу.* ■ *Шундай уңайһыҙ, шундай яйһыҙ булып китте был һүҙҙәрҙән һуң миңә.* Д. Бикташев.

**ЯЙҺЫҘЛАНЫУ** *к. һөйл.* Яйһыҙлыҡ һиҙеү; ҡыйынһыныу, уңайһыҙланау.

**ЯЙҺЫҘЛАУ** *к. һөйл.* Яйһыҙлыҡ килтереү; ҡамасаулау, уңайһыҙлау. *[Әремдәрҙең] тамыры .. бураҙна ярған сағында яйһыҙлар һиңә.* С. Кудаш.

**ЯЙҺЫҘЛЫҠ** *и.* **1.** Ҡыйынлыҡ тыуҙырған уңайһыҙ шарт; яйһыҙ хәл, уңайһыҙлыҡ. *Беҙ һаман да постоялый дворҙа тора инек. Бында, әлбиттә, ҙур ғына яйһыҙлыҡтар бар.* С. Агиш.

**2.** Күңелгә ҡыйынлыҡ килтергән хәл; уңайһыҙлыҡ. *[Егеттәр] яйһыҙлыҡтан ҡотолор өсөн шахмат уйнарға ултырҙы.* Б. Бикбай.

**ЯК** [*рус.* ⟨ *тиб.*] *и.* Үҙәк Азияның таулы ерҙәрендә йәшәгән ҡорһаҡ аҫты оҙон йөнлө, мөгөҙлө, имеҙеүсе көйшәр хайуан.

**ЯКОРЬ** [*рус.*] *и.* **1.** Карап, маяҡ кеүек нәмәләрҙе бер урында тотоу өсөн һыу төбөнә төшөрөлә торған ауыр ырғаҡ рәүешендәге нәмә. *Якорь ташлау. Якорҙан ысҡыныу.*

**2.** *эл.* Электр машинаһының әйләнмәле өлөшө.

**ЯҠ**[1] *и.* **1.** Билдәле бер йүнәлеш, тараф һәм шул тарафтағы урын. *Алғы яҡ. Ҡул яғы. Тауыш килгән яҡ.* ■ *[Сәғиҙә:] Инәй, .. яңылыш яҡҡа китеп бармайбыҙмы икән?* М. Тажи. *Ҡарт өс яҡҡа ҡарап өс уҡ атҡан* (Әкиәттән). / Донъя тарафтары. *Көнсығыш яҡ. Төшлөк яғы. Ҡибла яғы.*

**2.** Билдәле бер ерлектәге урын; өлкә, ил. *Тыуған яҡ. Белмәгән яҡ. Ялан яғы.* ■ *Беҙҙең яҡ — ҡырыҫ яҡ, ашлыҡ һуң өлгөрә.* Р. Низамов. *[Егет:] Уҙаман,.. өҫ-башыңа ҡарағанда беҙҙең ырыу кешеһе түгелһең, ҡайһы яҡ һин? — тип һораған* (Әкиәттән).

**3.** Урта төштән ситтәге йәки нимәнеңдер ян буйындағы тараф һәм шул тарафтағы урын. *Бер яҡҡа боролоу. Ике яҡтан баҫыу. Уң яҡтан ултырыу. Һул яҡтағы урын.* ■ *Урамдың бер яғы — ҙур-ҙур йорттар, ҡаршы яҡта — ҡала баҡсаһы.* Ғ. Сәләм. *Арғы яҡҡа баҫма һалдым, бирге яҡта шәүләһе* (Халыҡ йырынан).

**4.** Йорт, бинаның бер өлөшө, бүлеге. *Түр яҡ. Ҡашаяҡ яҡ.* ■ *Мансаф йоҡлай алманы. Таҡта менән генә бүленгән икенсе яҡта ятҡан әсәһе лә .. бик оҙаҡ йоҡламай ятты.* Ә. Вәли. / Бөтөндөң ниндәйҙер бер өлөшө. *Ағастың баш яғы. Ҡулдәктең итәк яғы. Үләндең тамыр яғы.* ■ *Һалдаттар крәҫтиәндәрҙең өлгөрмәгән ашлығын .. теләп сапмайҙар. Берәр покос сығалар ҙа: — Был яғы үҙҙәренең ашарына ҡалһын инде,.. сапмайыҡ [тиҙәр].* Д. Юлтый. / Эш-хәл йәки мәсьәләнең бер өлөшө. *[Бригадир:] Миңә генә тапшыр, ҡалған яғын үҙем рәтләрмен.* Б. Бикбай. *Шулай булғанмылыр, юҡмылыр — ул яғын мин белмәйем.* М. Тажи.

**5.** Нәмәнең ҡайһылыр тарафтағы өҫтө, йөҙө. *Ағастың мүк баҫҡан яғы. Ҡулдың һырт яғы. Тауарҙың тиҫкәре яғы. Япраҡтың аҫҡы яғы.* ■ *[Батша:] Мейестең тыш яғынан уратып .. ут яғығыҙ* (Әкиәттән).

**6.** Берәй кеше йәки нәмәләге айырым бер сифатты, үҙенсәлекте күрһәткән һыҙат, билдә. *Башҡаларҙан өҫтөн яҡ. Етешһеҙ яҡ. Докладтың йомшаҡ яғы. Эштең теоретик яғы. Холоҡтоң насар яҡтары.* ■ *Кешене бергә тора башлағас ҡына ныҡлап беләһең бит ул. Мансаф та Рәүфәнең күп яҡтарын әле генә күрҙе.* Ә. Вәли. *Донъя шул .. бар уның рәхмәт яғы, зәхмәт яғы.* Ш. Бабич. / *сгн. клш.* Берәй үҙенсәлеккә, сифатҡа бәйле булғанды белдерә. *Аҡыл яғынан өҫтөн. Теоретик яҡтан көслө. Һәр яҡтан етешле. Көнкүреш яғынан хеҙмәтләндереү.* ■ *[Сәлмән ағай] былай иптәшлек яғынан бик яҡшы .. ине.* Т. Йәнәби.

**7.** *эйл. ф.* Берәй эш-хәлгә бәйле мәсьәләгә ҡарата әйтелә. *Ашау яғы яҡшы. Кеҫә яғы таҡыр. Китеү яғын уйлау.* ■ *Был урында һыу яғы насар тиҙәр. Был тирәлә аҡҡан йылға ла, күл дә юҡ.* Д. Юлтый.

**8.** Бер-береһенә кире мөнәсәбәттәге кешеләр, төркөм, ойошма һ. б. *Аҡтар яғы. Ҡыҙылдар яғына сығыу. Яҡ-яҡ булып көрәшеү.* ■ *Тиҙ генә гәскәр туплап, ҡаршы барып ҡарай был, әммә теге яҡ бик көслө булып сыға* (Әкиәттән). / Туғанлыҡ, нәҫел нигеҙендә бүленеүгә ҡарата әйтелә. *Егет яғы. Ҡыҙ яғы. Ата яғынан туған кеше. Әсә яғындағы нәҫел-ырыу.*

**9.** *мат.* Геометрик фигураның бер ҡырын тәшкил иткән тура һыҙыҡ. *Өсмөйөштөң яҡтары. Дүртмөйөштөң ҡаршы яҡтары.*

**10.** *бәйл. функцияһында* Төбәү килештә килеп эш-хәл барышындағы йүнәлеште белдерә. *Һүҙҙе икенсе яҡҡа бороу. Эште ыңғай яҡҡа ебәреү.*

◆ **Бер яҡҡа ла** бер нисек тә, бер төрлө лә. *Бер яҡҡа ла ярарлыҡ түгел.* ■ *Зиннәтулла, килбәтең юҡ исмаһам бер яҡҡа ла.* Ш. Бабич. **Бер яҡта торһон** ниҙелер өҫтөн ҡуйып маҡтағанда әйтелә. *Бал барҙа, шәкәрең бер яҡта торһон.* **Ярты яҡ** төп урын йәки йүнәлештән ситтә ятҡан урын, ер. *Оло юлдан ярты яҡта ултырған ауыл.*

**ЯК**[2] *и. кар.* **яңаҡ.** *Як һөйәге. Як теш. Ишек яғы.*

**ЯҠЛАНЫУ** *ҡ. төш. кар.* **яҡлау**[1]. *Ваҡытында яҡланған диссертация.* ■ *Ғаилә дәүләт тарафынан яҡлана.* «Башҡортостан АССР-ының Конституцияһы», 1984.

**ЯҠЛАТЫУ** *ҡ. йөкм. кар.* **яҡлау**[1]. *Кешене яҡлатыу. Диплом яҡлатыу.*

**ЯҠЛАУ**[1] *ҡ.* **1.** Кемделер йәберләргә, ҡыйырһытырға ирек бирмәй ҡурсыу. *Баланы яҡлау. Яҡлап алып ҡалыу.* ■ *[Союз] батрактарҙы бик яҡлай тиҙәр ине, былай булғас раҫ булып сыҡты инде.* Т. Йәнәби.

**2.** Ниндәйҙер эш-хәлдә теләктәшлек күрһәтеп, хуплау. *Яҡлап сығыу. Файҙалы эште яҡлау.* ■ *Сыртланов оҙон итеп һөйләне, ләкин кемде яҡлағанын, кемгә ҡаршы һөйләгәнен белеп булманы.* С. Агиш. *[Сәсән] яманлыҡты яҡламаҫ, дошман хәтерен һаҡламаҫ* (Ҡобайырҙан).

**3.** Фәнни эш, хеҙмәт, проект һ. б. баһалатыу өсөн махсус ултырыш, советҡа ҡуйып иҫбатлау. *Диплом эше яҡлау. Диссертация яҡлау. Проект яҡлау.*

**4.** *юр.* Ғәйепләнеүсе кеше файҙаһына, уны ҡурсалап, судта сығыш яһау.

**ЯҠЛАУ**[2] *ҡ.* Хәл ҡылымдың *-п* формаһында төрлө һүҙгә эйәреп, эш-хәлдең урынын, тарафын белдергән рәүеш яһай. *Урман яҡлап ҡайтыу. Дүрт яҡлап уратып алыу. Ике яҡлап ағас ултыртыу.* ■ *Гәүһәр каса-боҫа ғына тыҡрыҡ яҡлап килде лә, келәттең бер мөйөшөнә һыйышты.* В. Исхаҡов. **Төрлө** (*йәки* **һәр) яҡлап** төрлө күҙлектән сығып, һәр тарафтан. *Төрлө яҡлап өйрәнеү. Һәр яҡлап тикшереү.*

**ЯҠЛАУСЫ** *и.* **1.** *юр.* Судта ғәйепләнеүсе кеше файҙаһына сығыш яһаусы юрист, адвокат. *Экскурстан һуң ғына яҡлаусы судта ҡаралған конкрет эшкә күсте.* Ғ. Әмири.

**2.** Кемделер йәберләргә, ҡыйырһытырға ирек бирмәгән, нәмәнелер ҡурсалаған, яҡлаған кеше; яҡсы.

**ЯКЛАШЫУ** *к.* **1.** *урт. кар.* **яклау**[1] 1—2.

**2.** *кар.* **яклау**[1] 1, 2. *[Юлия] уйнап, һыуланып инһә, әсәһе ороша, ә Григорий яклаша торғайны.* Һ. Дәүләтшина.

**ЯКЛЫ** *с.* **1.** Күпмелер яғы булған.

**2.** Кем йәки нәмәнелер яклаған, кем менәндер фекерҙәш, теләктәш булған. *Халык яклы. Тыныслык яклы. Икеһе бер яклы.* ■ *Был вакыттарҙа .. яңылык яклылар һәр ерҙә күренмәй ине.* М. Ғафури. *Халык алты батырҙы яраткан, улар яклы булған, батшаны һанға һукмай башлаған* (Әкиәттән).

**3.** Һан төшөнсәле һүҙҙәр менән килеп, билдәле бер үҙенсәлекте күрһәткән сифат яһай. *Күп яклы белем.* ■ *Башкорт халкы тарихы ла, милләттең формалашыу процестарының күп яклы булыуын күрһәтә.* «Совет Башкортостаны», 1988, 5 март. **Бер яклы** 1) уңы һәм һулы булған (тукымаға карата); 2) бөтәһен дә эсенә алмай, бер төрлө генә (төрлө эш-хәл, мәсьәләнең каралыуына карата). *Бер яклы ғына хәл итеү.* **Ике яклы** 1) ике яғы ла уң тип һанарлык (тукымаға карата). *Ике яклы драп;* 2) ике төркөм араһында булған. *Ике яклы килешеү.*

**ЯКМЫШ** *и. диал.* Шәңкә.

**ЯКСЫ** *и.* Кем йәки ниҙәлер яклап, курсалаусы кеше; яклаусы. *Мин зәһәрле ут шарының саткыһы, мин зәһәрләнгән халыктың яксыһы.* Б. Ишемғол.

**ЯКТАУ** *и.* **1.** Тирмә кирәгәләрен бер-береһенә бәйләй торған кыл бау.

**2.** *диал. кар.* **яңак** 2.

**ЯКТАШ** *и.* Кем менәндер бер яктан, бер өлкәнән булған кеше. *Йәнтимер минең якташ. Беҙ икебеҙ ҙә Тук тигән йылға буйының малайҙары.* С. Агиш.

**ЯКТЫ** I *с.* **1.** Кояш, ай, ут нуры төшкән; нурға тулы. *Якты көн. Якты төн. Якты булмә.* ■ *Һуғыш монары капланы ватандың якты күгең.* Р. Ниғмәти. *Караңғы төндө якты итә электрҙың уттары* (Халык йырынан). / Сағыу, баҙык нурлы (нур сығанағына карата). *Якты ай. Якты йондоҙ. Якты ут.* ■ *Минең илемдә кояш та якты.* М. Хәй. *Ағас араһында .. һикерешеп якты нур уйнай.* М. Кәрим.

**2.** *кусм.* Бәхетле, кыуаныслы. *Якты тормош. Якты яҙмыш.* ■ *Һин бәхетле, һин шатлыклы һәм якты барыр юлың.* Р. Ниғмәти. *Ярлы илдең бәхете, якты көнө фәкәт табыла аңда, белемдә.* Ғ. Амантай. / Ихласлык белдергән, асык. *Якты йөҙ. Якты сырай.* / Саф, изге. *Якты теләк. Якты хыял.* ■ *[Юламан карттың] якты өмөтө бер касан да ерҙә ятып калмаған.* З. Биишева. / Хөрмәткә лайыклы, изге. *Батырҙарҙың якты исәҙ леге.*

II *и.* **1.** Ниндәйҙер сығанактан килгән нур, уның сағылышы. *Ай яктыһы. Кояш яктыһы. Кар яктыһы. Якты төшөү. Якты күрмәй үскән улән.* ■ *Әхмәҙулла бабай .. ут яктыһына йыйылған төн күбәләктәрен куҙәтә.* Ә. Вахитов. **Көн яктыһында** көндөҙ, караңғы төшкәнсе. / *диал.* Шәм. *Якты яндырыу. Якты төртөү.*

**2.** Матур тормош, аң-белем символы. *Яктыға ынтылыу.* ■ *Беҙ төҙөгән колхоздар яктыға, бәхеткә илтәсәк кешене.* Б. Бикбай.

♦ **Якты донъя** *шул ук* **был донъя** (*кар.* **донъя** 10). **Якты күҙҙә** *кар.* **күҙ.**

● *Татлынан татлы якшы һүҙ, затлынан затлы якты йөҙ.* Әйтем.

**ЯКТЫЛЫК** *и.* **1.** Күҙгә күренгән һәм тирә-якты күренерлек иткән электромагнит нуры. *Көн яктылығы. Таң яктылығы. Яктылык көсө. Яктылык төшөү.* ■ *Таң.., тәҙрәләргә зәңгәр яктылык куна.* Н. Мусин. *Ай булмағас, төн караңғы, бар яктылык айҙа икән* (Халык йырынан).

**2.** *кусм.* Бәхетле, кыуаныслы тормош. *Яктылыкка ынтылыу.* ■ *[Алдағы көндәр] беҙгә яктылык вәғәҙә итмәй.* Д. Юлтый.

**ЯКТЫРТКЫС**[1] *и.* Нурланып, якты булып торған күк есеме.

**ЯКТЫРТКЫС**[2] *с.* Яктылык биргән, яктырткан. *Яктырткыс ракета.*

**ЯКТЫРТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **яктыртыу** 1—3. *Яктыртылған шәм. Газетала яктыртылған мәсьәлә.*

**ЯКТЫРТЫУ** *к.* **1.** Яктылык биреп, якты итеү. *Кояш яктырта. Шәм яктырта.* ■ *Йәшен кинәт яктырткан арала оҙон үләнгә башты йәшерәбеҙ.* С. Кулибай. *Тракторға куйылған көслө фара, караңғылыкты кисеп, барыр юлды яктырта.* Я. Хамматов.

**2.** Ниҙеңдер яктыһын йүнәлтеп, якты итеү. *Шырпы сыйып яктыртыу.* ■ *[Якуп] кул фонары менән яктыртып, эскә атланы.* Б. Бикбай.

**3.** *кусм.* Асык, якты итеп күрһәтеү, дөрөҫ йүнәлеш биреү. *Белем яктыртып тора халыктар барасак юлды.* Р. Ниғмәти. / Сағылдырыу, тасуирлап күрһәтеү (сәнғәттә, әҫәрҙә һ. б.). *Газетала яктыртыу.*

**4.** *кусм.* Йөҙгә, сырайға алсак төҫ биреү. *Йөҙөн яктыртып йылмайып каршылау.* ■ *[Әбей:] Колош мулла килеп ингән дә, сырайҙарын яктыртып, көлөп тора имеш, тием.* Т. Хәйбуллин.

**5.** *әйһ. кар.* **яктырыу**[1] 3. *Ғариф староста уянып китте .. Яңы яктыртып килә ине.* Ж. Кейекбаев.

**ЯКТЫРТЫУСЫ** *и.* Сәхнәне прожектор менән яктыртып торған эшсе.

**ЯКТЫРЫУ**[1] *к.* **1.** Төн үтеп, таң атыу, көн яктыһы килеү. *Яктыра башлау. Яктырғанды көтөү.* ■ *Фәиз бөгөн һыңлап уянды. Күптән яктырғайны.* В. Исхаков. *Кояш сығып, яктырғанда, барып керҙек Өфөгә* (Бәйеттән).

**2.** Яктыға әйләнеү, якты булыу, асыкланыу. *Көн яктырҙы. Ай калкты, төн яктырҙы. Донъя яктырҙы.* ■ *Ғәйни ағай .. тышка сыкканда таң якшы ук яктырған, күк салт аяҙ, тып-тын ине.* Т. Йәнәби. * Етеле асма шәмде яндырғас.., өй эсе яктырҙы.* Я. Хамматов.

**3.** Яктылык биреү, нур сәсеп балкыу, нурланыу (нур сығанактарына карата). *Ай яктыра.* ■ *Баш осонда янған электр яктырғандан һаман яктыра.* Ғ. Амантай.

**4.** *кусм.* Асык, акты булып күренеү. *Берәүһе уның — Мөхәббәт, берәүһе — Нәфрәт уның, ошо ике утың булһа, яктырыр гүмер юлың.* Р. Ниғмәти. / Төҫ асылыу, алсакланыу. *Сырайы як-*

*тырҙы.* ■ *Мине күреүгә [катындың] былай ҙа якты йөҙө тағы ла яктырып, янып китте.* С. Агиш.

**ЯКТЫРЫУ** [2] *к. йөкм. кар.* **яғыу** [1] 1—4. *Мейескә яктырыу. Мунса яктырыу. Күмер яктырыу.*

**ЯКТЫРЫУ** [3] *к. йөкм. кар.* **яғыу** [2]. *Икмәккә май яктырыу. Кершән яктырыу. Һалды ярға яктырыу.*

**ЯКУТ** [1] *и.* Якутияның төп халкын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (төрки телдәрҙең береһендә һөйләшә). *Якут халкы. Якут катыны. Якут теле.*

**ЯКУТ** [2] *и.* Бер төркөм аҫыл таштың (рубин һәм сапфирҙың) дөйөм исеме. *Кыҙыл якут. Зәңгәр якут. Һары якут. Якут ташы. // Якут каш.*

**ЯКУТСА** *р.* **1.** Якут телендә. *Якутса һөйләшеү.*

**2.** Якут халкына хас рәүештә. *Якутса кейенеү.*

**ЯКШАТ** *и.* Кеше араһында таралған якшы исем; абруй. *Якшат каҙаныу. Якшат һаклау.*

**ЯКШАТЛАНЫУ** *к.* Кемгәлер ярарға, якшы күренергә тырышыу; ярамһакланыу. *Ул [әбей] Камыр батырҙы ишек асып, якшатланып каршы алған* (Әкиәттән).

**ЯКШАТЛЫ** *с.* Якшы, һәйбәт кеше булып һаналған (ғәҙәттә кемгәләр ярамһакланыу, якшатланыуға нигеҙләнгән була). *Якшатлы булыу.* ■ *Бала-сағаларға ла ит һогондороп, һөйәк тоттороп, якшатлы булырға тырыштылар.* Һ. Дәүләтшина. *[Планды алдарак үтәү] минеңсә, план өсөн көрәшеүҙән бигерәк, һеҙҙең алда якшатлы булып күренергә тырышыуҙан да ине.* И. Абдуллин.

**ЯКШЫ** *с.* **1.** Ыңғай баһаланған, талапка яраилы, юғары сифатлы; *киреһе* насар. *Якшы аҙык. Якшы ат. Якшы кейем. Якшы йорт. Якшы булыу. // Якшы ашатыу. Якшы эшләү. Эште якшы алып барыу. // Якшыны эҙләү. Якшыны ғына кейеү.* ■ *[Муйылдың кыҙына] киләсәк яусыларҙың якшы, бай урындарҙан булыуына өмөтө ҙур ине.* Һ. Дәүләтшина. *[Ғәйни ағай:] Быйыл ашлыктарым якшы күренә.* Т. Йәнәби. / Матур, уңай тәьҫир калдырған (сәнғәт әҫәрҙәренә, әҙәбиәткә, музыкаға карата). *Якшы китап. Якшы картина. Якшы музыка.* / Ниндәйҙер ыңғай сифаттар сағылған; матур, һәйбәт. *Якшы кәйеф. Якшы көн. Тәбиғәттең якшы яктары.* / Ыңғай эстәлекле, күңелгә яткан. һәйбәт. *Якшы кәңәш. Якшы мөнәсәбәт. Якшы ниәт. Якшы теләк. Якшы һүҙ. // Кешенең эшенә якшы карау. Кеше тураһында якшы уйлау.* ■ *Теләк теләп торогоҙ, якшы уйҙа булығыҙ* (Бәйеттән).

**2.** Эше, тәжрибәһе юғары баһаланған, оҫта булған. *Якшы агроном. Якшы врач. Якшы етәксе. Якшы укытыусы.* ■ *[Таминконың] һалдат массаһын үҙенә карата торған бер сифаты булһа, ул да уның якшы йырсы булыуы.* Д. Юлтый.

**3.** Мораль яктан һәйбәт, тәбиғәте менән мактауға, хуплауға лайыклы; *киреһе* яман, насар. *Якшы бала. Якшы егет. Якшы иптәш. Якшы холок. // Үҙеңде якшы тотоу. Якшы күренергә тырышыу.* ■ *Якшы атаның балаһы шәһит үлә яу йөрөп.* Салауат Юлаев.

**4.** Теләккә ярашлы; матур, һәйбәт. *Якшы киләсәк. Якшы тормош. // Якшы бөтөү. Эш якшы тамамланды.* ■ *Кешеләр унда якшы ғүмер юлын партия акылы менән таптылар.* Ғ. Сәләм. *Бик якшы ғына йәшәп ятканда [карттың] бисәһе үлеп киткән, ти* (Әкиәттән). / Нимәлер өсөн уңайлы, кулайлы; һәйбәт. *Якшы мал. Якшы вакытта килеү. Иртә тороу якшы булды.* ■ *Ат сабыу өсөн кырпак карҙан да якшы вакыт .. юк.* Ғ. Дәүләтшин.

**5.** Үҙ-ара таныш, якын мөнәсәбәттә булған. *Якшы таныш.* ■ *Ир башкайҙарына нужа төшһә, якшы дуҫтар йөрөмәҫ ят итеп* (Халык йырынан).

**6.** *и. мәғ.* Белем йәки тәртиптең юғары кимәлен билдәләгән баһа. *Якшы билдәһе. Якшы алыу. Якшыға укыу.*

**7.** *р. мәғ.* Кәрәк кимәлдә, тейешле дәрәжәлә. *Якшы белеү. Якшы күреү.* ■ *[Имай укытыусыға:] Якшы тырыштырығыҙ. Бигерәк тә руссаларын нык тикшерергә кәрәк.* Һ. Дәүләтшина. / Булыу кимәле юғары, нык. *Көн якшы кыҙҙыра. Һыу якшы ғына ташкан.* **Якшы** ук нык кына, һиҙелерлек. *Тән якшы ук яктырҙы. Якшы ук һыуытты.*

● *Матурҙы күрге килә, якшыны алғы килә.* Әйтем. *Изге эштең иртәгеһе якшы.* Мәкәл. *Эт тә якшы өндәшһәң, койроғон болғар.* Мәкәл.

**ЯКШЫЛАНЫУ** *к. һөйл.* Якшыға әйләнеү, якшырыу.

**ЯКШЫЛАП** *р.* Якшы итеп, тейешенсә, еренә еткереп. *Якшылап аңлатыу. Якшылап таҙартыу. Якшылап эҙләү.* ■ *Эреҫ еңгә .. якшылап төшөнә алманы.* Ғ. Дәүләтшин. *Имән батыр якшылап аш әҙерләгән, ти* (Әкиәттән).

**ЯКШЫЛЫК** *и.* **1.** Кемгәлер йәки нәмәгәләр карата эшләнгән һәйбәт, якшы эш. *Якшылык кылыу. Якшылык итеү. Якшылык көтөү. Якшылык эшләү.* ■ *Айбулат ул вакытта [Ныязғолдарҙың] был изгелектәре өсөн .. әллә ниндәй якшылыктар эшләргә уйлағайны.* Һ. Дәүләтшина. **Якшылык менән** кемделер куркытырға теләп янау рәүешендә киҫәтеп әйтелә. *Якшылык менән әйтәбеҙ, ағай, юлыңда бул! камасаулама — тине Хәкимйән, сабырлығын юймаҫка тырышып.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Уңыш, бәхет килтергән, һөҙөмтәһе файҙалы булған төрлө эш-хәл тураһында. *Якшылык теләү. Эште якшылык менән бөтөрөү.* ■ *Эйе, якшылык булмаҫ был никахтан, булмаҫ.* З. Биишева. / Нимәнеңдер теләккә ярашлы якшы (3 мәғ.) булыуы тураһында. *Тормоштоң якшылығы. Һауаның якшылығы.*

● *Якшылыкка якшылык — һәр кешенең эшелер, яманлыкка якшылык — ир кешенең эшелер.* Мәкәл.

**ЯКШЫЛЫКЛЫ** *с.* Кешегә карата яуызлығы булмаған, якшылык эшләгән; изгелекле. *[Низам:] Гөлнур, һин беләһең, Гөлбикә әбей .. якшылыклы кеше.* Р. Ниғмәти.

**ЯКШЫРТЫУ** *к.* Булмышы, эстәлеге, эшләнеше яғынан юғары кимәлгә күтәреү, якшы итеү. *Продукцияның сифатын якшыртыу. Эште якшыртыу. Мәкәләне кабаттан эшләп якшыртыу.*

*Тормошто якшыртыу.* ■ *Ауыл тормошон якшыртыуҙа ниндәйҙер планлы хәстәрлек .. күҙгә бәрелә.* К. Мәргән. / Ыңғай күренештәрҙе булдырыу, якшы яҡҡа үҙгәртеү, һәйбәтләү (хәл-әхүәл, күңел торошона ҡарата). *Кәйефте якшыртыу. Һаулыкты якшыртыу.*

● *Алтын йүгән яман атты якшыртмаҫ.* Мәҡәл.

**ЯҠШЫРЫУ** *к.* Булмышы, эстәлеге, эшләнеше яғынан юғарыраҡ кимәлгә килеү, яҡшыға әйләнеү. *Йәшәү якшырҙы. Тормош якшырҙы. Эштәр якшырҙы. Юл якшырҙы.* ■ *Балаларҙың яҙыуҙары һиҙелерлек якшырҙы, матурлаға төштө.* М. Тажи. / Асылы һәйбәтләнеп ыңғай күренештәр барлыҡҡа килеү (хәл-әхүәл, күңел торошона ҡарата). *Күңел якшырҙы. Сәләмәтлек якшырҙы. Баланың холко якшырҙы.* ■ *Прокурорҙың хәле кискә табан якшырҙы.* С. Агиш.

**ЯҠШЫҺЫНЫУ** *к. кубр. юкл.* Яҡшы тип табыу, хуп күреү, яҡшыға һанау. *Түргә үтеүҙе якшыһынманы. Өлөлар алдында ултырыуҙы якшыһынмаҡы.* / Кемдәндер тартыныу, оялыу. *[Сәлимдең] иҙмәһен иҙергә уйлап куйҙы Исмәгил. Әммә тыйылып калды. Хәлимәнән якшыһынманы.* Я. Вәлиев.

**ЯҠШЫ-ЯМАН** *и. йыйн.* Төрлөсә баһаланған эш-хәл һәм кешеләргә ҡарата. *Якшы-ямандан һакланыу.* ■ *Һиҙиәт бабай! Зиһенең һәр сак һиҙгер, донъялағы якшы-яманга.* Р. Бикбаев.

**ЯҠЫН** *с.* **1.** Бәләкәй ара менән айырылған, йәнәш, эргәләш булған; *киреһе* алыҫ. *Якын ауыл. Якын ер. Якын ара. Якын булыу. // Якын йөрөү. Якын ултырыу.* ■ *Кәлимулла .. оҙон колга тотоп алган да дөрләп янган йорто эргәһенә берәуҙе лә якын ебәрмәй.* Ғ. Байбурин. *Якынга бирһәм, ялкытыр, тип, алыҫка бирҙе атакайым* (Сыңләүҙән). **Якын да ебәрмәү** (*йәки* **килтермәү, юлатмау**) 1) якынлашырға, эргәгә килергә ирек бирмәү; 2) нәмәгәләр тотондормау, эшкә ҡатнаштырмау. *Һунар эшенә якын да юлатмау.*

**2.** Ваҡыт араһы бәләкәй, тиҙҙән буласаҡ. *Якын киләсәк. Якын көндә.* ■ *Инде таң да якын, вакыт етә тороп мейескә утын ягырга.* Д. Юлтый. *[Әбей:] Ахыры заман якындыр инде. Шулай булмаһа, халык был тиклем аҙмаҫ ине.* Т. Йәнәби. **Якын арала** тиҙ ваҡыт эсендә. / *р. мәг.* Нимәлер булыр йәки ниндәйҙер ваҡыт етер алдынан булғанды белдерә. *Кискә якын кайтыу. Эш бөтөүгә якын.* ■ *Турысай ҙа атым ай ашыкмай, таңга якын ятып юшамай* (Халыҡ йырынан).

**3.** Үҙ-ара йылы мөнәсәбәттә, тығыҙ бәйләнештә булған. *Якын иптәш. Якын таныш. Тугандарса якын булыу. Якын итеү.* ■ *[Батша — кейәүенә:] Бынан һуң һине һис кенә сит итмәм,.. иң якын кешем, серҙәшем итеп күрермен* (Әкиәттән). / Бик ныҡ туған, ҡәрҙәшлеге кеслө булған. *Якын туган. Якын коҙа. // Үҙ якындарын йыйыу.* ■ *[Гөлйөҙөм] Заһиттың барып йөрөгән иң якын еңгәһе.* Һ. Дәүләтшина. *Ятам гирмәмдә. Тугандарым, якындарым минең эргәмдә.* Салауат Юлаев. **Якын күреү** үҙ кешең, яҡын кешең итеп күреү. / *кусм.* Йылы хис уятырлыҡ; ҡәҙерле. *Ниндәй матур был төн, ниндәй якын минең күңелгә.* Х. Ҡунаҡбай.

**4.** *бәйл. функцияһында* Төбәү килештәге һүҙҙәр менән килеп: а) булмышы, асылы менән нимәгәләр ныҡ тартым, оҡшаш булғанды белдерә. *Дөрөҫкә якын һүҙ. Тормошка якын әҫәр.* ■ *Санитарҙар яраһы бәйләнгәндәрен двуколкага тейәйҙәр .. Үлеүгә якын булгандарын бер якка ташыйҙар.* Д. Юлтый; б) нимәнендер самаса кимәлен, күләмен белдерә. *Бер гектарга якын ер. Йөҙгә якын кеше.* ■ *Ун көнгә якын эш эҙләп караһак та, тамак туйҙырырлык рәтле эш таба алманык.* Т. Йәнәби.

♦ **[Күңелгә] якын алыу** ысын хис менән ҡабул итеү. *Кеше һүҙен якын алыу.* **Якын да килмәү** (*йәки* **бармау**) 1) бөтөнләй риза булмау. *Хәмдиә якын да килмәне: «Куй, куй, кәрәкмәй!»* Һ. Дәүләтшина; 2) бөтөнләй тура килмәү. *Яуабы якын да килмәй.*

● *Алыҫ менән якынды юрткан белер.* Мәҡәл. *Яманга якын барһаң, бәләһе йогор.* Мәҡәл.

**ЯҠЫНАЙТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **якынайтыу.**

**ЯҠЫНАЙТЫУ** *к.* **1.** Ике араларғы алыҫлыҡты кәметеү, яҡын итеү. *Юлды ауылга якынайтыу. Өҫтәлде тәҙрәгә якынайтыу.*

**2.** Ваҡыт арауығын кәметеү. *Вакыт утә шулай, якынайтып йәшәу менән үлем араһын, ә һин бараһың да бараһың.* Н. Нәжми.

**3.** Яҡын мөнәсәбәтле, ҡәҙерле итеү. *Үҙеңә якынайтыу.* ■ *Ысын тарихи вакигалар .. балаларга ҙур йогонто яһап, уларга тыуган ерен якынайта.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», 1968, № 3. / Нимәнендер булмышы, асылындағы айырманы кәметеү. *Дөрөҫлөккә якынайтыу. Әҙәбиәтте тормошка якынайтыу.*

**4.** Сама менән билдәле бер һан күләмәнә, дәүмәленә яҡын килтереү, булған айырманы кәметеү. *Меңгә якынайтыу. Йөҙгә якынайтыу.*

**ЯҠЫНАЙЫУ** *к.* **1.** Ике араларғы алыҫлыҡты кәметеп, яҡын килеү; яҡынлау. *Ярга якынайыу. Ауылга якынайыу.* ■ *Теләгән ерҙәренә якынайгандан якынайҙылар, туры бейә быларҙы бойҙай эргәһенә алып килеп етте.* Т. Йәнәби.

**2.** Ике араларғы ваҡытты кәметеп, яҡын килеү; яҡынлау. *Кыш якынлая.* ■ *Ә Кадир, туй көнө якынайганлыктан,.. акса әҙерләү хәстәренә керешге.* Б. Бикбай.

**3.** Кем менәндер йылы мөнәсәбәткә инеү, дуҫлыҡ булдырыу; дуҫлашыу. *[Сәгиҙә кыҙҙарга] якынайырга, йөрәктәренә керергә тырышты.* М. Тажи. / Булмышы, асылы йәки менән нәмәгәләр тартым булыу, яҡын килеү. *Революциянан һуң ижад ителгән нәҫер публицистикага якыная төштө.* Ә. Вахитов.

**4.** Күпмелер һан, күләм-дәүмәл самаһына яҡын килеү; яҡынлау. *Йөҙгә якынайыу.*

**ЯҠЫНДА** *р.* **1.** Яҡын урында. *Матур урын. Якында гына Агиҙел аша һалынган тимер юл күпере.* С. Агиш.

**2.** *һөйл.* Яҡын көндә. *Якында калага барып килергә кәрәк.*

**ЯҠЫНДАҒЫ** *с.* Яҡын урындағы, яҡын тирәләге. *Якындагы ауыл. Якындагы тау.* ■ *Ирйегет ауылдан сыккас, якындагы калага барып, байга ялланган.* З. Биишева.

**ЯҠЫНДАН** *р.* **1.** Бик яҡын торған хәлдә, ҡаршыға килеп. *Якындан күреү. Якындан карау.*

**2.** Тығыҙ бәйләнештә булып, яҡын мөнәсәбәткә инеп. *Яҡындан белеү. Яҡындан танышыу.* ■ *[Айбулат Титов] менән бик яҡындан дуҫлашып китте.* Һ. Дәүләтшина.

**ЯҠЫН-ЙОРО** *и. диал.* Дуҫ-иш.

**ЯҠЫНЛАУ** *к.* **1.** Хәрәкәт итеп араны ҡыҫҡартыу, яҡын килеү, яҡынайыу. *Ауылға яҡынлау. Урманға яҡынлау. Яҡынлап килгән ямғыр.* ■ *Ныяҙғол Рәхимә менән һөйләшә-һөйләшә ашъяулыҡҡа яҡынланы.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ваҡыт араһы кәмеү; яҡынайыу. *Китер көн яҡынлай. Таң яҡынлай. Эштең аҙағы яҡынлай.* ■ *Яҙҙар етә, ана тамсы тама, йылы саҡтар килә яҡынлап.* Ш. Бабич.

**3.** Булмышы, асылы менән нәмәгәләр оҡшаш, тартым булыу, яҡын килеү; яҡынайыу. *Дөрөҫкә яҡынлау. Төп мәсьәләгә яҡынлау.*

**4.** Самаса билдәле бер һан күләменә, ниндәйҙер дәүмәлгә яҡын килеү. *Мал ике меңгә яҡынланы. Етмеш йәшкә яҡынлау.*

**ЯҠЫНЛАШТАРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **яҡынлаштырыу** 3. *Тормошҡа яҡынлаштырылған сәхнә әҫәре.*

**ЯҠЫНЛАШТЫРЫУ** *к.* **1.** Хәрәкәт иттереп, ара алыҫлығын кәметеү. *Кәмәне ярға яҡынлаштырыу.*

**2.** Тығыҙ мөнәсәбәткә килтереү, яҡын итеү, дуҫлаштырыу. *Үҙ-ара яҡынлаштырыу. Бергә эшләү яҡынлаштырҙы.*

**3.** Булмыштағы, асылдағы айырманы кәметеү. *Теорияны практикаға яҡынлаштырыу. Ысынға яҡынлаштырыу.*

**ЯҠЫНЛАШЫУ** *к.* **1.** Хәрәкәт итеп, араны ҡыҫҡартыу; яҡынайыу, яҡынлау. *Яҡынлашып килеү.* ■ *Аҡ елкәнле диңгеҙ кәмәһе, һалмаҡ ҡына сайҡалып ярға яҡынлашты.* З. Биишева. / Һүҙ барышында нимәгәләр яҡын килеү. *[Ғариф ағай] үҙен баҙарға килтергән төп сәбәпкә яҡынлашты.* Б. Бикбай.

**2.** Ваҡыт араһы кәмеү; яҡынлау. *Байрам яҡынлаша. Көҙ яҡынлаша.* ■ *Эңер яҡынлашты. Киҫкә табан көн һыуытты.* Я. Хамматов.

**3.** Үҙ-ара тығыҙ мөнәсәбәткә килеү; дуҫлашыу. *Беҙ тамам яҡынлашҡайныҡ, үҙләшкәйнек инде.* Д. Юлтый.

**4.** Булмышы, асылы менән нәмәгәләр тартым булыу, яҡын килеү; яҡынайыу. *Тормошҡа яҡынлашҡан сәхнә әҫәре.*

**5.** Самаса билдәле бер һан күләменә, ниндәйҙер дәүмәлгә яҡын килеү. *[Ныяҙғол] илле бишкә яҡынлашҡан булыуына ҡарамаҫтан, әле йәштәр кеүек ныҡ.* Һ. Дәүләтшина.

**6.** *һөйл.* -ға формаһындағы ҡылымдарға эйәреп, нимәләр эшләргә яҡын торғанды, ниңдәйҙер сиккә еткәнде белдерә. *Иларға яҡынлашыу.*

**ЯҠЫНЛЫҠ** *и.* **1.** Нимәгәләр яҡын (1 мәғ.) булған хәл. *Ауылдың яҡынлығы.*

**2.** Ике аралағы яҡын мөнәсәбәт, тығыҙ бәйләнеш. *Күбеһе Зөлхизә менән Фәтхи һалдат араһындағы булған яҡынлыҡты белә ине.* С. Агиш.

**ЯҠЫНСА** *р.* **1.** Сама менән. *Яҡынса алғанда. Диңгеҙ яҡынса ике километр булыр.*

**2.** Бер сама, әҙ-мәҙ. *Яҡынса ғына белеү.*

**ЯҠЫН-ТИРӘ** *и.* Яҡында булған урын, ер; тирә-яҡ. *Яҡын-тирәлә ултырған ауылдар. Яҡын-тирәнән килгән халыҡ // Яҡын-тирә ерҙәр.* ■ *Яҡын-тирә колхоздар ҡыҙыл обоз менән иген оҙаталар.* Б. Бикбай.

**ЯҠЫН-ЯРЫ** *с.* Яҡындағы, эргәләге. *Яҡын-яры урын.* // *Яҡын-яры барырлыҡ түгел. Яҡын-яры ебәрмәй.*

**ЯҠ-ЯҠ** *и. йыйн.* Төрлө тараф. *Яҡ-яҡҡа ҡарау. Яҡ-яҡтан килеү.* ■ *Дон буйынан ҡуҙғалып, яҡ-яғына күҙ һалып, Бүгәсәү тигән бер батыр .. халыҡҡа оран ташлаған.* Салауат Юлаев.

**ЯЛ** [1] *и.* **1.** Көс йыйыу, хәл алыу өсөн эш-хәрәкәт араһында яһаған өҙөк. *Ял сәғәте. Ял биреү. Ялға туҡтау.* ■ *Эшләп арығас, үлән өҫтөндә ултырып ял алам.* Б. Ишемғол. / Эш, хеҙмәт кешеләренә көс йыйыу, дауаланыу өсөн бирелгән ваҡыт. *Йәйге ял. Ял көнө. Ялда булыу.* ■ *Унда [минең илемдә] кешеләр эшкә, ялға хаҡлы.* Ғ. Сәләм.

**2.** *күсм.* Күңел тыныслығы, ҡәнәғәтлек тойғоһо. *Йөрәккә ял алыу. Күңелгә ял булыу.* ■ *Күбәләктәй күңелем бер ҡуҙғалғас, ҡауышмай ҙа тороп ял алмаҫ* (Халыҡ йырынан).

□ **Ял итеү** эштән туҡтап көс йыйыу, хәл алыу.

● *Алда булһа ҙур теләк, эштән ял таба йөрәк.* Әйтем.

**ЯЛ** [2] *и.* Ҡайһы бер хайуандарҙың елкә буйына оҙон булып үҫкән ҡыл. *Ҡуйы ял. Ат ялы. Арыҫлан ялы.* ■ *Сал ялдарын туҙғытып, бер-береһен ҡурҡытып, аттар тулаған һымаҡ.* М. Ғәли. *Атты екһәң ек ерәнен, ялы ергә тейгәнен* (Халыҡ йырынан). / Йылҡы малының елкә буйындағы май ҡатламы. *Ҡаҡлаған ял.* ■ *[Рәхимә] майы һарҡып торған ял киҫәктәрен ипләп кенә телемләп ҡырҡҡылай.* Һ. Дәүләтшина.

**ЯЛ** [3] *и.* **1.** Кемдер файҙаһына эшләгән эш һәм шул эш өсөн бирелгән түләү. *Эш ялы. Тамаҡ ялына эшләү. Ял аҡсаһы.* ■ *Ҡасим Әхмәҙиҙән көн ялын һорарға барҙы. Өс көн көнләклэп ағас төбө таҙартҡайны.* А. Таһиров. *Бикйән ялсылыҡта ла йөрөп ҡарай, мәгәр мандый алмай: ял хаҡын бирмәй интектерәләр* (Әкиәттән).

**2.** Кемдеңдер кеше нәмәһенән файҙаланыуы һәм шуның өсөн түләнгән хаҡ. *Ялға алыу. Ялға биреү.*

◆ **Аяҡ ялы** *кар.* **аяҡ** [1].

**ЯЛА** *и.* Кемгәләр яғылған ялған ғәйеп. *Яла яғыу.* ■ *[Абдулланың] бөтә булған эше — кешегә яла яғыу, наҡаҡтан кешене рәнйетеү.* Я. Хамматов.

● *Ағай-эне кәҙерен ялалы булғас белерһең.* Мәҡәл.

**ЯЛАҒАЙ** [1] *и.* Бик алыҫта, офоҡта күк күкрәмәй генә ялтлаған йәшен уты. *Күк йөҙө аяҙ, ҡибла яҡта ялағай уйнай.* А. Таһиров.

**ЯЛАҒАЙ** [2] *с.* Яҡшы күренергә, кемгәләр ярарға тырышҡан; ярамһаҡ. *Ялағай кеше. Ялағай булыу.* ■ *Миңеңсә, яуыҙдың яҡшы дуҫы булмағандай, ялағайҙың ғына дошманы юҡ.* Н. Нәжми.

**ЯЛАҒАЙ** [3] *диал. Ялҡау.*

**ЯЛАҒАЙЛАНЫУ** [1] *к.* Ҡуштанланып яҡшы күренергә, кемгәләр ярарға тырышыу; ярамһаҡланыу. *Ҡалам, һин ни күрһәң, шуны күрермен, — тигән ул [егет], Абдрахманға ялағайланып.*

Ә. Вахитов. *Эт ялагайланып, койрогон болгап, һунарсы янына килә башлай* (Әкиәттән).

**ЯЛАҒАЙЛАНЫУ**[2] *к. диал.* Ялҡауланыу. *[Юлай:] Был Биктимер ошо осорҙа бик ялагайланып китте әле .. Малды йүнләп, йәйрәтеп ашата белмәй.* С. Мирасов.

**ЯЛАҠ**[1] *и.* Үлән үҫмәгән, тоҙо сығып ятҡан татырлы урын.

**ЯЛАҠ**[2] *и.*, **ялаҡ ауыҙ** Тамаҡ өсөн кемгәлер ялағайланып һырынған кеше. *Ялаҡ ауыҙҙар өсөн ниндәйҙер бер һылтау табып Мырҙашты тарарга, Мырҙашты ашарга — был уларҙың төп кәсебе.* Д. Юлтый.

**ЯЛАМЫС** *и. һөйл.* Ҡорот ҡайнатҡанда ҡалҡҡан күбек (балаларға яларға бирәләр).

**ЯЛАН**[1] *и.* **1.** Асыҡ, тигеҙ урын. *Киң ялан. Ҡола ялан. Ялан ягы.* ■ *Сиге күренмәй йәйелеп ятҡан киң, тигеҙ яланды ҡырҡып үткән оҙон, һай, йәйпе йылга буйына Ялпаҡйылга ауылы ултырган.* Ғ. Дәүләтшин. *Ялан гына ере ай ҡылганлыҡ, буҙәнәләр йүгерә төбөндә* (Халыҡ йырынан). / Баҫыу, ҡыр. *Ялан эше.* ■ *[Ғәйни:] Яланга барып, ашлыҡтарҙы ҡарап ҡайтырга уйлап торам әле.* Т. Йәнәби. **Ялан кеүек** майҙандың ҙурлығына баҫым яһағанда әйтелә. *Ялан кеүек ырҙын табагы. Ялан кеүек ишек алды.* ■ *[Өммиә:] Ялан кеүек биш бүлмәне бер итеп йөрөй-йөрөй арып бөтәм.* Ғ. Әхмәтшин. / Өйҙән ситтәге, тәбиғәткә яҡын ер. *Яланга сыгыу. Яланда йөрөү.* ■ *Дим тамагында ваҡ-ваҡ ҡына кәмәләр күренә. Улар — ял көнө бит — яландан ҡайталар.* С. Агиш.

**2.** Ҡайһы бер ботаник терминдар менән килеп үҫемлектең далаға хас төрөн белдерә. *Ялан йылаһы. Ялан көпшәһе. Ялан сагany.*

♦ **Ялан кәртә** *ҡар.* **кәртә** 3.

**ЯЛАН**[2] *с.* Өҫтән кейем, көп менән ҡапланмаған. *Ялан аяҡ. Ялан баш. Ялан ҡул. Ялан өҫ.* ■ *[Хәйретдин менән Күккүҙ] ялан ҡылыс ялтыратып, көс һынашҡан.* Н. Иҙелбай.

**ЯЛАН**[3] *с.* Буйлыҡ ебе бер генә ҡат булған. *Ялан киндер. Ике теүәл бер ялан киндер. // Киндерҙе ялан һалыу.*

♦ **Ялан ҡат** 1) бер генә ҡат. *Ялан ҡат бишмәт. Ялан ҡат кейем. Ялан ҡат тәҙрә;* 2) *күсм. диал.* ябай, бер ҡатлы. *Ялан ҡат кеше.*

**ЯЛАН**[4] *р. диал.* Һәр ваҡыт, гел. *Ялан бер һүҙ. Ялан әрләшеү.*

**ЯЛАНҒАС** *с.* **1.** Өҫтөндә бер төрлө лә кейем, көп булмаған. *Ялангас тән. // Ялангас йөрөү. Сыр ялангас ҡалыу.* ■ *Көн бик һыуыҡ. Ялангас ҡулды сыгарыуы ла имәнес.* Т. Хәйбуллин. / *күсм.* Йүнле кейеме булмаған, ярлы. ■ *Иҫкә алдыҡ гажиз булган бик күп асты, кейемдән мәхрүм булган ялангасты.* М. Ғафури. / *р. мәг.* Өҫкә йылы кейем киймәй. *Ялангас урамга сыгыу.* **Ҡыҙыл яланғас** кейемһеҙ, сыр яланғас.

**2.** Япрағы булмаған, япраҡһыҙ. *Ялангас агас. // Урман ялангас ултыра.* ■ *Бөҙрә, бөҙрә, бөҙрә тал, ялангас ҡалыр йәй үткәс* (Ҡобайырҙан). / Үҫемлек үҫмәгән йәки насар үҫкән; буш. *Ялангас ҡая. Ялангас тау. // Ялангас тороу.* ■ *Шыр ялангас ятҡан киң яландар .. бына йәнләнер.., ер йәшәреп донъя йәмләнер.* Т. Йәнәби.

**3.** Бер ни менән дә йыһазландырылмаған, ябылмаған; буш. *Ялангас стена. Шыр ялангас өй.*

● *Тун кәҙерен белмәгән ҡыҙыл ялангас ултырыр.* Мәҡәл.

**ЯЛАНҒАСЛАНДЫРЫУ** *к.* Яланғасҡа (2мәғ.) әйләндереү, яланғас итеү. *Агастарҙы ялангасландырып һалҡын көҙ килде.*

**ЯЛАНҒАСЛАНЫУ** *к.* **1.** Яланғасҡа әйләнеү, яланғас булыу. *Ялангасланган ялан.* ■ *Тәбигәт ялангасланган.., йәйелеп ятҡан йәйге зәңгәрһыу күренештәр хәҙер инде тоноҡ бер төҫкә ингән.* М. Гажи. *Һөнәрсе эҙләнеүен дауам иткән .. Арып, йонсоп, ялангасланып бөткән.* З. Биишева.

**2.** *һөйл.* Ярлыландырыу, фәҡирлеккә төшөрөү. *Халыҡ һугыштан һуң ялангасланды.*

**ЯЛАНҒАСЛЫҠ** *и.* **1.** Яланғас булған хәл. *[Кәртә эсендә] шыр ялангаслыҡ, ҡипкәнлек, көйгәнлек, корогалыҡ күренә.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Кейем-һалым етешмәгән ҡыйын хәл, ярлылыҡ. *Аслыҡты ла, ялангаслыҡты ла күрҙек. Бирешмәнек.* Ш. Шаһәр.

**ЯЛАНҒЫРТ** *и.* Яланға тартым асыҡ ер. *Мин .. ерке үләненең ысыгын һирпеп, ялангырт буйлап барам.* М. Сәғитов.

**ЯЛАНҠАЙ** *с. диал.* Дилдалай.

**ЯЛАНЫП-ЯҪҠАНЫУ** *к.* **1.** Нимәгәлер ымһынып иренде ялау. *Ит хаҡында һүҙ сыҡҡас, айыу ҙа телен сыгарып, яланып-яҫҡанып ҡуйган.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *күсм.* Унан-бынан эләктереп, тамаҡ туйҙырыу. *Низамый агай үҙе гүмер баҡый байҙар тирәһендә яланып-яҫҡанып .. йөрөй.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЯЛАНЫУ** *к.* **1.** Үҙ алдыңа ниҙер ялау. *Яланып ултырыу.*

**2.** Иренде ялау. *[Бабай] яланып алды һәм иренен ҡыбырлатып ҡуйҙы.* К. Мәргән.

**ЯЛАН-ЯПАН** *и. йыйн. һөйл.* Йәйрәп ятҡан тигеҙ яланға ҡарата.

**ЯЛАП-ЯҪҠАУ** *к. һөйл.* Ялап таҙартыу, һыпырып ялау. *Бесәй сеүәтәләге һөттө эсеп, ялап-яҫҡап ҡуйган.* Ж. Кейекбаев.

**ЯЛАСЫ** *и.* Яла яғыусы. *Яңылышлыҡмы был? Әллә бер яуыз уйлы, выжданһыҙ ҡара йөрәк яласының мәкерлегеме?* М. Гажи.

**ЯЛАТЫЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **ялатыу.** 2. *Алтын ялатылган беләҙек.*

**ЯЛАТЫУ** *к.* **1.** Яларға биреү, яларға ҡушыу. *[Бабай] ике бүртә аргымагына балыҡтың ҡанын ялатҡан* (Әкиәттән).

**2.** Биҙәү маҡсатында затлы металл иретмәһен йоҡа ғына итеп яғыу, өҫтән йүгертеү. *Алтын ялатыу. Көмөш ялатыу.*

♦ **Ҡан ялатыу** *ҡар.* **ҡан**[1] 1.

**ЯЛАУ** *к.* Нәмәнеңдер өҫтөнән тел менән һыпырыу. *Ирende ялау. Ҡалаҡ ялау.* ■ *Бүребай шыңшый-шыңшый Айрас янына килде, уның ҡулдарын, битен яланы.* Ш. Насыров. / Тел йәки бармаҡ менән һыпырып ашау, эсеү. *Бал ялау.* ■ *Аҡназар тос майҙан һарҡып сыҡҡан һөҙләктө үҙенең усынан .. ялап ултырҙы.* Ғ. Дәүләтшин. *Ҡола ат тоҙҙо туйгансы ялап китте лә барҙы, ти* (Әкиәттән). / *күсм.* Нимәнелер тотош ҡаплап,

уратып алыу (ут, тулҡын һ. б. ҡарата). *Ут яланы урман биттәрен.* Б. Вәлит. *Тулҡын һикерә,.. тулҡын ялай Иҙел ярҙарын.* М. Кәрим.

♦ **Тәрилкә ялау** *кар.* **тәрилкә. Ус ялау** кем йәки нимәнәндер әҙ-мәҙ файҙа күреү. *[Зәлифә:] Ауылдың байынан гүмерҙә лә ус ялап булмаҫ ине.* Ғ. Дәүләтшин.

● *Ашап туймағанды ялап туймаҫһың.* Мәҡәл.

**ЯЛАУЫС** *и.* Осона көмөш аҡса төйгән ҡот яулығы (ҡоҙаларҙы ҡаршылаған йәштәр шул яулыҡты елберләтеп, һыбай ҡаеа; арбалы йәки саналы ҡоҙалар ҡыуып етеп, яулыҡты ала).

**ЯЛАШЫУ** *к. урт. кар.* **ялау.**

● *Эт талашыр, ауыҙ-морон ялашыр.*

**ЯЛБАРЫУ** *к.* Түбәнселек менән бик ныҡ үтенеп кемгәлер мөрәжәғәт итеү; ялыныу, инәлеү. *Аллаға ялбарыу. Ялбарып һорау.* ■ *Купме генә ялынмаһын, ялбармаһын, Заятүләк һыу ҡыҙын ебәрмәй.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**ЯЛБАРЫШЫУ** *к. урт. кар.* **ялбарыу.**

**ЯЛБЫР** *с.* **1.** Ян-яҡҡа таралып, туҙғып торған оҙон ҡуйы йөнлө йәки ҡыллы. *Ялбыр койроҡ. Ялбыр сәс. Ялбыр эт.* ■ *[Карт] төргәктән ялбыр папаха алып, башына кейеп ҡуйҙы.* З. Биишева. **Ялбыр баш** ҡыҙ балаларға, ҡатын-ҡыҙға әйтелә. / Ҡуйы, тарбаҡ ботаҡлы. *Ялбыр ҡылған.* ■ *Ярҙарында телдар сайкалалар, шаулашалар ялбыр ҡайындар.* Р. Ниғмәти.

**2.** *диал. кусм.* Хәйләһеҙ, бер ҡатлы. *Ялбыр кеше.*

**ЯЛБЫРАУ** *к.* **1.** Оҙон булып һалынып төшөү, туҙғыу. *Ялбыраған сәс. Ялбырап торған билгау суғы.* ■ *[Тайҙарҙың] йәй буйы ябағалары ҡойолмай ялбырап йөрөйҙәр.* Б. Бикбай.

**2.** Тетелеп туҙыу, йыртылып теткеләнеү. *Ялбырап бөткән кейем.*

**ЯЛБЫР-ЙОЛБОР** *с.* Ялбырап һалынып торған, теткеләнеп туҙған. *Ялбыр-йолбор булыу.* // *Әллә ниндәй сүп-сар ялбыр-йолбор осоп йөрөй.* Ш. Насыров.

**ЯЛБЫРЛАТЫУ** *к.* Ян-яҡҡа туҙғытыу, туҙҙырыу (ялбыр нәмәне). *Ялбырлатып болгау. Сәсте ялбырлатып йөрөү.*

**ЯЛБЫРЛАУ** *к. кар.* **ялбырау.**

**ЯЛБЫРСАҠ** *и. һөйл.* Төрлө туҡыма киҫәктәренән ҡорамалап, суҡландырып теккән ябыу әйбере.

**ЯЛҒАН** *с.* **1.** Ысынға тап килмәгән, ысын булмаған, алдыҡ. *Ялған хәбәр.* // *Ялғанға ышаныу.* ■ *Һүҙҙәрҙең барыһы ялған, береһе ысын һүҙ түгел.* Ш. Бабич. *Нәфсе аҙғынлыҡҡа, ялған боҙоҡлоҡҡа өндәй, намыҫ онотола. Ә иң аяныслыһы кеше яҙмыштары тапала.* Ә. Хәкимов.

**2.** Ысынға оҡшатып яһалған, алдау маҡсатында эшләнгән. *Ялған аҡса. Ялған документ.* ■ *[Ҡыҙрас] ялған һаҡал-мыйығын алып ырғыта. Бөтә халыҡ Ҡыҙрасты танып, таң ҡала* (Әкиәттән).

**3.** Ике йөҙлө; яһалма. *Ялған мөнәсәбәт.* ■ *Ялған дуҫың оҡшаш күләгәгә: ҡояш булһа ҡалмаҫ артыңдан, әгәр инде көнөң болот булһа — юғалыр ул өнһөҙ алдыңдан.* Р. Ғарипов.

● *Ялғандың бото ҡыҫҡа.* Әйтем.

**ЯЛҒАНЛАУ** *к.* Алдап һөйләү, алдау. *Ярты айҙы төндә күрәләр ҙә, йомро тиҙәр, ярты тимәйҙәр. Белмәйем, улар кемде ялғанлайҙар..?* Ғ. Хәйри.

**ЯЛҒАНЛЫҠ** *и.* Алдауға ҡоролған, ысын булмаған эш, һүҙ һ. б.; алдыҡ. *Ялғанлыҡ һәм угрылыҡ хөкөмдә бәрәбәрҙәр.* М. Өмөтбаев.

**ЯЛҒАНМА** *и.* Ағастың ашлап ҡуйған ботағы йәки бөрөһө.

**ЯЛҒАНСЫ** *и.* Ялған һүҙ һөйләүсе кеше, алдаҡсы. *Ялғансыға ышанып йөрөү.* // *Ялғансы кеше.* ■ *Кәртә була алмаҫ ялғансы минең барыр изге юлыма!* М. Сөндөклө.

● *Ялғансының шаһиты янында.* Мәҡәл.

**ЯЛҒАНЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **ялғау**[1]. *Ялғанган бау.*

**2.** Алда булған эш-хәл, күренеш менән бәйләнеп, ҡушылып дауам итеү. *Сәғәт туғыҙынсы китә, ал таң көнгә ялғана.* Т. Арслан. / Фекер, һүҙҙәр үҙ-ара бәйләнеп, ҡушылып дауам итеү. *Һүҙ һаман ялғанып китә алмай торҙо.* Ә. Харисов. *Кинәт кенә көлкө башлана, береһе башлай, икенсеһе ҡушлай, әкиәттәргә әкиәт ялғана.* Ғ. Мәсғүт.

**3.** Туҡталып торған хәлдән яңынан ғәмәлгә килеү, дауам итеү. *Дөрөҫлөк еңде яманды, өҙөлгән дуҫлыҡ ялғанды.* Н. Нәжми.

**4.** Бер-бер артлы килеү, үҙ-ара тоташыу. *Өйҙөң һул яғында.. — кирбес келәт, уға текәлеп, ялғанып киткән ҡура, бәләкәй генә һарай.* Һ. Дәүләтшина.

**ЯЛҒАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **ялғау**[1] 1. *Өҙөлгән сымды ялғатыу. Һынғанды ялғатыу.*

**ЯЛҒАУ**[1] *к.* **1.** Өҙөк йәки айырым нәмәне бер-береһенә ҡуша беркетеү. *Өҙөлгән бауҙы ялғау. Һынған нәмәне ялғау.* ■ *[Ғариф ағай] ике ҡарағош табып, колхоз салғыларын ялғаны.* Б. Бикбай. / Оҙонайтыр өсөн ҡушып беркетеү. *Ҡолға етмәгәс, арҡан ялғап төшөрҙөләр, ти* (Әкиәттән).

**2.** Алда булған эш-хәл, күренеш менән бәйләнеп, ҡушылып дауам иттереү. *Мәргүп .. Ғәләүҙе яҡлап, электән үк булған талашты ялғап ебәрмәҫме!* Т. Йәнәби. *Һаңғырау ғына яңғырап.. ишетелә туп тауыштары. Уға сытырҙап, пулемёттар ялғап алып китә.* Ф. Иҫәнғолов. / Бер фекерҙе, һүҙҙе икенсегә бәйләү, йәки алдағы фекергә ҡушылып дауам иттереү. *Ялғап һөйләү.* ■ *Ҡайҙандыр бик алыҫтан .. ҡурай тауышы ишетелә, ул минең өҙөлгән уйҙарымды тағы ла ялғап алып китә.* Б. Ишемғол. *Әхмәҙулла бабай .. баҫалҡы тауыш менән һүҙен ялғап алып китте.* Ә. Вахитов.

♦ **Көндө төнгә, төндө көнгә** (*йәки* **көн менән төндө**) **ялғау** көндө төндән айырмай, бер итеп, туҡтауһыҙ тигән мәғәнәлә ҡулланыла. *Көндө төнгә, төндө көнгә ялғап эшләү.* ■ *[Сәғиҙә] барыһына ла етешергә, өлгөрөргә тырышты.., көндө төнгә ялғарҙай булып йөрөп ятты.* М. Тажи. **Ҡул ялғау** *кар.* **ҡул**[1]. **Тамаҡ** (*йәки* **үҙәк**) **ялғау** *кар.* **тамаҡ.**

**ЯЛҒАУ**[2] *и.* **1.** Оҙайтыу, киңәйтеү өсөн ҡуйылған өҫтәмә. *Ялғау ҡушыу.*

**2.** *лингв.* Һүҙҙең тамырына йәки нигеҙенә ҡушылып лексик йәки грамматик мәғәнә биргән киҫәк. *Зат ялғауы. Килеш ялғауы. Үҙгәртеүсе ялғау. Яһаусы ялғау.*

**ЯЛҒАУЛЫ** *с.* Ялғап эшләнгән, ялғауы[2] (1 мәғ.) булған. *Ялғаулы бау. Ялғаулы ең.*

**ЯЛҒАШ** *и.* Оҙонса сөм һауыт. *Ағас ялғаш. Тимер ялғаш.*

**ЯЛҒАШЫУ** *к. урт. ярҙамл. кар. ялғау*[1] 1. *Өҙөлгән арҡанды ялғашыу.*

♦ **Ҡул ялғашыу** *шул уҡ* **ҡул ялғау** (*кар.* **ҡул**[1]).

**ЯЛҒЫҘ** *с. диал.* Яңғыҙ.

**ЯЛҒЫШ** *с. диал.* Яңылыш.

**ЯЛДАҠ** *с. диал.* Ялҡау.

**ЯЛДАУ** *и. диал.* Ялдым.

**ЯЛДАШ**[1] *с. һөйл.* Ялбыр яллы. *Ялдаш ат.*

**ЯЛДАШ**[2] *и. һөйл.* Тәнгә һуҡҡандан ҡалған билдә, эҙ.

**ЯЛДЫМ** *и. иҫк.* Һыуҙың тәрән урыны; ятыу, сөңгөл. *Шулгән һайыҡһа юшҡындан, ике башлы дейеүҙәр ҡайҙа ялдым табыр ул.* «Аҡбуҙат».

**ЯЛҠАҠ** *и. диал.* Маңҡа ауырыуы.

**ЯЛҠАУ** *с.* Эшкә ихласлығы булмаған, эш һөймәҫ. *Ялҡау кеше. Ялҡау булыу. Ялҡау ғына эшләү.* // *Ялҡауға әйләнеү.* ■ *Мөсәххихтәр эсендә ялҡауы күп, берәүе тырыш булһа, алтауы сүп.* Ш. Бабич. *Ат бик ялҡау булды бит. Һарҡыуҙа ла йүнләп юртмай.* С. Агиш. **Ата ялҡау** *йәки* **эт ялҡауы** бик нығ ялҡау кешегә әйтелә. **Ялҡау килеү** нимәлер эшләргә йыбаныу, иренеү; ялҡауланыу. **Ялҡауға һалышыу** ялҡауға әйләнеү, ялҡау булып китеү. **Ялҡауға ял** эшләргә иренеп торған кешегә туҡтарға бер сәбәп сыҡҡанда әйтелеә.

● *Ялҡау баҫып йоҡлай, ултырып эшләй.* Әйтем.

**ЯЛҠАУЛАНЫУ** *к.* Ялҡауға әйләнеү, ялҡау булыу. *Тиҫкәреләнеп, ялҡауланып, эшкә, хеҙмәткә өйрәнеп булмай.* С. Агиш.

**ЯЛҠАУЛЫҠ** *и.* Ялҡау кешегә хас сифат.

● *Ялҡаулығыңды юҡ итһәң, тамағыңды туҡ итерһең.* Мәҡәл.

**ЯЛҠЫҠ** *и. һөйл.* **1.** (*йәки* **ялҡыҡ еҫ**) Тәне янып ауырыған кешенән килгән ауыр еҫ.

**2.** Ашҡаҙандан килгән әсе һут (ғәҙәттә үҙәк көйгәндә була).

**ЯЛҠЫЛДАУ** *к.* Ялтылдау, ялтлау.

**ЯЛҠЫН** *и.* **1.** Янғанда барлыҡҡа килгән ут шәлкеме, ялпылдап торған ут. *Көслө ялҡын. Ялҡын теле. Ялҡын күтәрелеү.* ■ *Ел ут ялҡынын ялпылдатып, тирә-яҡҡа ҡыуалай башланы.* М. Тажи. / Бик көслө эҫелек. *Ялҡын бәреп тора.* ■ *[Ҡояштың] ҡыҙыуынан ялан ялҡынға әйләнде.* Һ. Дәүләтшина. *Селләләрҙә һағынам һалҡынды, һалҡындарҙа һағынам ялҡынды.* Ә. Атнабаев.

**2.** *күсм.* Көслө хис. *Ҡайғы-хәсрәт ялҡынында булыу.* ■ *Йөрәгемдә минең мәңге һүнмәй торған ялҡын бар.* Ф. Рәхимғолова. / Көслө ынтылыш, дәрт. *Хеҙмәт ялҡыны.* ■ *Мәңге янған ҡояш ялҡынынан көслө йөрәк ялҡыны.* Ғ. Хәйри.

♦ **Ялҡын йотоу** *шул уҡ* **ут йотоу** (*кар.* **ут**[1]).

**ЯЛҠЫНЛАНЫУ** *к.* **1.** Ялҡын барлыҡҡа килеү, дөрләү. *Ялҡынланып яныу.* ■ *Ут инде һүнә төшкәндә генә, кабаттан ялҡынланып тоҡанып китте.* Я. Хамматов.

**2.** *күсм.* Хис, дәрт менән ярһыу. *Дәртле күкрәктәрҙән ташып, ҡайнап, ялҡынланып сыға йырҙары.* Ғ. Мәсғүт.

**ЯЛҠЫНЛАТЫУ** *к.* **1.** Ялҡынлы итеү, ялҡын булдырыу. *Ялҡынлатып костёр яндырыу.*

**2.** *күсм.* Хис менән дәртләндереү, ярһытыу. *Алға баҡ, кәлбең яҡ, ялҡынлат.* Ш. Бабич.

**ЯЛҠЫНЛАУ** *к.* Ялҡын булып тоҡаныу, ялҡынлы булыу. *Бер ялҡынлап, бер төтөнләп, яна һалдат усағы.* Ә. Атнабаев.

**ЯЛҠЫНЛЫ** *с.* **1.** Ялҡын булып дөрләп янған. *Ялҡынлы ут. Ялҡынлы булыу. Ялҡынлы итеү.* / *күсм.* Бик ҡыҙыу, көслө. *Ялҡынлы граждандар һуғышы.*

**2.** *күсм.* Көслө хискә тулы, янып торған. *Ялҡынлы ҡараш.* / Көслө дәрткә тулы. *Ялҡынлы телмәр.*

**3.** *күсм.* Берәй эшкә мөкиббән бирелгән, эш өсөн янған. *Ялҡынлы революционер.*

**ЯЛҠЫТҠЫС** *с.* Күңелгә оҡшамаған, биҙҙергес сифаты булған. *Ялҡытҡыс эш. Ялҡытҡыс йонсоу көндәр.*

**ЯЛҠЫТЫУ** *к.* Гел бер төрлө булып, ҡабатланып йонсотоу, йәнгә тейеү, биҙрәтеү, туйҙырыу. *Юламановты оҙаҡҡа тартылған бәхәс ялҡытты.* Н. Мусин. *Туҡтауһыҙ быҫҡаҡлап яуған көҙгө ямғыр ялҡытты.* Я. Хамматов.

**ЯЛҠЫУ** *к.* Гел бер төрлө нәмәнән йонсоп, биҙрәү; туйыу. *Эшһеҙ ятып ялҡыу. Бер төрлө аштан ялҡыу.* ■ *Тыңлап ултыра торғас, Сәғиҙә лә ялҡа башланы.* М. Тажи.

**ЯЛЛАНДЫРЫУ** *к.* Ҡыҙарып, юлаҡланып торған эҙ ҡалдырыу. *Ялландыра һуғыу.*

**ЯЛЛАНМА** *с.* Билдәле бер хаҡ өсөн ялланып башҡарылған. *Ялланма хеҙмәт.* ■ *Хужалыҡтар бөлгөнлөккә төшә, уларҙың хужалары ялланма хеҙмәт кешеләренең сафын тулыландыра.* «Совет Башҡортостаны», 1986, 26 февраль./Ялланып эшләгән. *Ялланма ғәскәр. Ялланма эшсе.*

**ЯЛЛАНЫУ**[1] *к.* Билдәле бер хаҡҡа йәки ниндәйҙер шартҡа күнеп эш башҡарыу. *Көтөү көтөргә ялланыу. Эшкә ялланыу. Ялланып эшләү.* ■ *Атайым ҡартайһа ла һаман кешегә ялланып бесән саба, ураҡ ура.* Т. Йәнәби.

**ЯЛЛАНЫУ**[2] *к.* **1.** Ит ултырып, ҡалынайыу (елкәгә ҡарата). *[Мырҙабаевтың] ялланып ҡуша үҫкән елкәһе, йомро яурын баштары көс аңҡытып тора.* Б. Бикбай.

**2.** Һуҡҡандан, бәрелгәндән ҡыҙара бүртеп тәндә юлаҡ барлыҡҡа килеү. *Ялланып тороу. Ялланып сығыу.* ■ *Ҡамсы эҙҙәре [көтөүсенең] арҡаһында ялланып, ярылып тора.* А. Таһиров. *Шайтан ашығымдың эргәһе ҡара ҡыҙыл булып ялланып сыҡҡан.* Н. Мусин.

**ЯЛЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **яллау.** *Эшкә кеше яллатыу.*

**ЯЛЛАУ** *к.* Хаҡын йәки шартын һөйләшеп, кемделер эшкә файҙаланыу, эшләтеү; кемдәндер эш көсөн һатып алыу. *Кеше яллау. Ат яллап барыу. Яллап эшләтеү.* ■ *Шулай бер саҡ бай көтөүсе ялламаҡ була, ти* (Әкиәттән).

♦ **Яллап ҡуйған тейерһең** кемдер бер кеше өсөн нығ тырышҡанда әйтелә.

**ЯЛМАЛАУ** *к. көс. кар.* **ялмау.** *Томанһырап, күгәреп, болоттарҙы ялмалап, Урал тора алдымда* (Ҡобайырҙан).

**ЯЛМАН** *и.* Кимереүселәр отрядына ҡараған, оҙон артҡы аяҡтары менән һикереп йөрөй торған, нәҙек оҙон ҡойроҡло дала йәнлеге. *Ялман өңө.* ■ *Яр ҡабырғаһындағы юлдың һаңын борҡотоп ялман сабып китте.* И. Көсәпҡол.

♦ **Һыу ялманы** *диал. ҡар.* **көшөл** [2]. **Ялман сыҫҡан** *диал. ҡар.* **ҡомаҡ** [1].

**ЯЛМАНЫУ** *ҡ.* **1.** Аш-һыуға ымһынып иренде ялау. *Ялманып ҡуйыу.*

**2.** *күсм.* Нимдәйҙер хис менән ымһыныу. *[Баттал] Ғәлимәнең беләктәренә,.. тулы күкрәктәренә ялманып ҡарай башланы.* А. Таһиров.

**ЯЛМАУ** *ҡ.* **1.** Уратып алып эләктереү, аймап алыу, ҡармау. *[Ураҡсы] һәр ялмауҙа берәр усма ҡайырып ала.* Я. Вәлиев. *Ысыҡты ялап, сәскәне ялмап, йылҡылдай салғы.* Р. Назаров. / Ҡарман алыу, ҡулға эләктереү. *[Һалдаттар] ашарға таптыра, .. ни эләкһә — шуны ялмай башланы.* Ф. Иҫәнғолов. / *күсм.* Шыуҙырмай тотоу, эләктереү. *Сатнап, сәсрәп торған ҡоро ҡар табанды ялмай.* З. Биишева *[Зәки] бәкенең йөҙөн бармаҡтары менән һәрмәп..,— ялмай ғына — тине.* В. Нафиҡов.

**2.** Тотош уратып тирә-яҡтан ҡамау, солғау. *Ул арала өйҙөң түбәһен ут ялмап алды.* Д. Юлтый. / *күсм.* Үҙенә йәлеп итеү, биләү. *Күңелде ялмау.* ■ *Тәмле-татлы емеш .. ялмай, күҙҙе ҡыҙҙыра.* Я. Ҡолмой. *Килдең һөйөү, йөрәгемде ялманың һин.* Ғ. Байбурин.

**3.** Иренде тел менән һыпырып алыу, ялау. *[Дәржеман] аҫҡы иренен теле менән ялмап ҡуйҙы.* А. Таһиров. *Ауыҙын ялмай-ялмай минең һарбайым .. килә.* Р. Ғабдрахманов.

**ЯЛМАУЫҘ** *и.* **1.** Туя белмәҫ ҙур ауыҙлы мифик зат. *Егет ҡыҙҙы бирмәҫ өсөн ете башлы ялмауыҙ менән .. һуғышып китте, ти* (Әкиәттән).

**2.** *күсм.* Туймаҫ тамаҡ (ҡомһоҙ кешегә ҡарата). *Ер алыуға ялмауыҙҙар йүгерештеләр, уҙ-ара талаштылар, һуғыштылар* (Бәйеттән).

**ЯЛП** *оҡш.* Етеҙ хәрәкәт менән ҡапыл ҡуҙғалғанды, ҡапыл күренгән йәки юҡ булғанды белдергән һүҙ. *Ялп итеп ҡалыу.* ■ *Көршәк ялп итеп ерғә осоп төшә.* З. Биишева.

**ЯЛПАЙТЫУ** *ҡ.* Киң итеп йәйелдереү; ялпаштырыу. *Ялпайта һуғыу.*

**ЯЛПАЙЫУ** *ҡ.* Киң булып йәйелеү; ялпашыу. *Ялпайып ятыу.* ■ *Таш менән һалмауырлап һуғып ебәргәйнем, әлеге ҡара йылан .. ялпайҙы ла ҡуйҙы* (Әкиәттән). / *күсм. һөйл.* Һимереп йыуанайыу; ярпайыу.

**ЯЛПАҠ** *с.* **1.** Тигеҙ өҫлө, киң яҫы йөҙлө; йәйпәк. *Ялпаҡ таш.* ■ *Өйҙәрҙең түбәһе ялпаҡ итеп .. ябылған.* Ғ. Дәүләтшин. / Киң, йәйенке. *Ялпаҡ битле кеше. Ялпаҡ танау.*

**2.** Өҫтө тигеҙ булған, тәпәш. *Ялпаҡ тауҙар.* ■ *Ауыл .. яҡ-яғы ҡамаулы бәләкәй генә ялпаҡ урләстә урынлашҡан.* Р. Байымов.

♦ **Ялпаҡ тел** ябай һөйләү теленә ҡарата әйтелә. *Ярлы башҡорттарҙың ялпаҡ теле дәүләт теле булып танылһын.* Х. Ғәбитов.

**ЯЛПАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Ялпаҡҡа әйләнеү, ялпаҡ булыу. *Ялпаҡланған шыма таш.* ■ *Урал һырттарындағы үркәс тауҙар ялпаҡлана төштө.* Р. Шәкүров.

**ЯЛПАНЛАУ** *ҡ.* **1.** Ялп-йолп итеү, ялп-йолп килеү; ялпылдау. *Ялпанлап осҡан ябалаҡ.*

**2.** *күсм.* Ҡулдарҙы ныҡ һәлтәп, шәп-шәп итеп, оса-төшә баҫыу. *Ялпанлап йәйәү барыу.* ■ *Истебай .. ялпанлап атлап ауылға инде.* Һ. Дәүләтшина.

**ЯЛПАШТЫРЫУ** *ҡ.* Ялпаҡ итеп йәйәү. *Ялпаштырып һалыу. Балсыҡты ялпаштыра һуғып һылау.*

**ЯЛПАШЫУ** *ҡ.* **1.** Йәйелеп, ерғә һеңешкән кеүек булыу; лапашыу. *Ялпашып ятыу.* / Сүгеү, тәпәшәйеү. *Хәҙер ауылдың ерғә тиңәлерҙәй булып ялпашҡан өйҙәрендә йәшәгән ярлылар .. күкрәк киреп ҡалҡҡан.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *һөйл.* Йөҙ түбән ҡапланыу. *Ялпашып барып төшөү.*

♦ **Ялпашҡыр(ы)** әрләгәндә, ҡарғағанда әйтелә.

**ЯЛП-ЙОЛП, ялп та йолп** *оҡш.* Ҡабат-ҡабат ялп иткәнде белдергән һүҙ. *Ялп-йолп килеү.* ■ *Бына ялп-йолп итеп төнгө ауҙан ҡайтып барған ябалаҡ осоп үтте.* Й. Солтанов.

**ЯЛПЫ** [1] *и.* Киң ҡатлам халыҡ; күмәк төркөм. *Эшсән ялпы. Ярлы ялпы. Ил ялпыһы. Халыҡ ялпыһы.* // *Ялпы халыҡ.* ■ *Һалдат ялпыһы эшселәр яғында булып, батшаларына, байҙарына ҡаршы мылтыҡ йүнәлдермәйенсә, бер нәмә лә сыҡмаҫ.* А. Таһиров.

**ЯЛПЫ** [2] *с.* Йыш ағаслы; ҡуйы. *Ялпы урман.* // *Ялпы шырлығы.* ■ *Ялпыларҙа үҫә йүкәләрең, тәмленән дә тәмле бал шунан.* М. Уразаев.

**ЯЛПЫ** [3] *с.* Ялпылдап торған; һалбыр. *Ялпы ҡолаҡ.* ■ *Ялпы ҡойроҡ етеҙ тейен, оя яһай ботаҡҡа.* Ғ. Ибраһимов.

**ЯЛПЫЛАШТЫРЫУ** *ҡ. иҫк.* Киң ҡатлам халыҡ араһына таратыу; халыҡлаштырыу. *Хәбәрселәр ерле матбуғатты ялпылаштырыуға ла бик ҙур хеҙмәт һалды.* Т. Йәнәби.

**ЯЛПЫЛДАҠ** *и.* **1.** *диал.* Ҡатмар, мәскәү.

**2.** *диал.* Һабан турғайы (*ҡар.* **турғай** 1).

**ЯЛПЫЛДАТЫУ** *ҡ.* Ялп-йолп иттереү; һалпылдатыу. *Уҡалы елән салғыйын ялпылдатып Хажисолтан бай алға сыҡты.* Я. Хамматов.

**ЯЛПЫЛДАУ** *ҡ.* **1.** Ел йәки хәрәкәт ыңғайына ялп-йолп итеү, ялп-йолп килеү. *[Миңлекәй:] Йә, ни бында аламаң ялпылдап, тур боҙоп йөрөйһөң.* Һ. Дәүләтшина. *Бер һыбайлы килә. Аты йомолоп саба .. — Бәрәк, был бит бисә кеше, яулығы ялпылдап килә.* Т. Килмөхәмәтов.

**2.** Етеҙ хәрәкәттәр менән шәп-шәп баҫып йөрөү. *Ялпылдап атлау.* ■ *Ҡыҫҡа аҡ тун, башына аҡ бүрек кейгән кешенең ялпылдап килгәне күренде.* Б. Бикбай.

**ЯЛПЫЛДАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **ялпылдау.** *Ялпылдашып ултырған муйыл, ҡайын, ерек, йүкәлектәр .. күңеләмә күркәм булып күренә.* Т. Килмөхәмәтов.

**ЯЛПЫУ** *и.* Ҡуйы ағаслыҡ. *Инйәр генә буйы ай ялпыуға, менеп кенә булмай ҡалҡыуға* (Халыҡ йырынан).

**ЯЛПЫШ** *с. диал. ҡар.* **Төпөш** [1].

**ЯЛП-ЯЛП, ялп та ялп** *оҡш. ҡар.* **ялп-йолп.** *Ялп та ялп ҡанат ҡағыу.* ■ *Ялп-ялп иткән ябалаҡ кемгә юлдаш булмаған* (Ҡобайырҙан).

**ЯЛСЫ** *и.* **1.** Бай кеше хужалығында хеҙмәт иткән кеше; хеҙмәтсе. *Ялсы булыу.* ■ *Сәлмән карт, уландары башка сығып киткәс, мал карау өсөн ялсы тота торғайны.* Ж. Кейекбаев. / *кусм.* Кемдеңдер мәнфәғәтенә ҡол булып, хеҙмәт иткән кеше. *Батша ялсылары.* ■ *Ҡулға төшкән Дутов ялсыларын әһ тиҙермәй эшен бөтөрөң.* Ш. Бабич.

**2.** *кусм.* Ау бәйләгәндә башлап ебәреү өсөн тоҡанлы еп ҡуйылған саталы ағас; шеш.

**ЯЛСЫҒЫУ** *к. һөйл.* Йәйәүләп оҙаҡ килгәндән йәки күңелһеҙ эште оҙаҡ эшләгәндән йонсоу; ялҡыу.

**ЯЛСЫҠТЫРЫУ** *к. һөйл.* Оҙаҡ эш-хәрәкәт менән йонсотоу; ялҡытыу. *Оҙон юл ялсыҡтырҙы.*

**ЯЛСЫЛЫҠ** *и.* Ялсы хеҙмәте. *Ялсылыкка биреү. Ялсылыкта йөрөү.*

□ **Ялсылыҡ итеү** ялсы хеҙмәтен үтәү.

**ЯЛСЫУ** *к. кар.* **йәлсеү.**

**ЯЛТ** *окш.* **1.** Яҡты, асыҡ булып, нур сәсеп, балҡып торғанды белдергән һүҙ. *Ялт итеү. Ялт иттереү. Ялт итеп ҡояш сыҡты.* ■ *Ай яҡты, бөтә тирә-яҡ ялт итеп тора ине.* Б. Бикбай. *Сепрәк сиселеп китте лә ялт итеп кыҙҙың йөҙөгө күренде, ти* (Әкиәттән). / Яҡшы сифатлы, ҡарауға матур булғанды белдергән һүҙ. *Ялт иттереп йыйыштырған булмә.* ■ *[Егеттәрҙең] өҫтөндә ялт иткән кыҙылармееҫ формаһы.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Бик етеҙ һәм ҡапыл булған эш-хәлде, хәрәкәтте белдергән һүҙ. *Ялт итеп әйләнеп ҡарау.* ■ *Өс ҡатын бер юлы ялт итеп уға боролдо.* Р. Солтангәрәев. *Беҙ .. бер таба ит бәлешен күҙ асып йомғансы ялт иттерҙек.* З. Биишева.

**ЯЛТАҒАЙ** *и. диал.* Бурысынан, вәғәҙәһенән ҡасып йөрөгән алдаҡсы кеше.

**ЯЛТАЙЫУ** *к. кар.* **ялтаныу.**

**ЯЛТАМБЫЙ** *и.* **1.** Ҡармаҡҡа тағылған алдатҡыс ялтыр ҡалай; ялтырма. *Ялтамбый менән балыҡ тотоу.*

**2.** Көрөҫ бауы менән табалдырыҡ бауын тоташтырған ҡулайлама; тейәк.

**ЯЛТАНДЫРЫУ** *к.* **1.** Ҡапыл бер яҡҡа тайпылдырыу; тайшандырыу, ялтартыу. *Юлдан ситкә ялтандырыу.*

**2.** *кусм.* Эштән ҡасырға, ситләшергә мөмкинлек биреү. *Ялтандырмай эшкә кушыу.*

**ЯЛТАНЛАУ** *к.* Күҙҙе ян-яҡҡа йүгертеү, ялт-йолт ҡараныу. *Сылтырап акса ҡойолдо. Егеттең күҙе ялтанланы.* Б. Бикбай. *Зәлифә тирә-яҡҡа ялтанлап ҡараны.* Һ. Дәүләтшина.

**ЯЛТАНЫУ** *к.* **1.** Ҡапыл бер яҡҡа тайпылыу; тайшаныу, ялтарыу. *Ситкә ялтаныу.* ■ *Мәсғут Ярулланан ялтаныҧ,.. класс тәҙрәһенә барып бәрелде.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *кусм. һөйл.* Берәй эш-хәлдән ҡасып ситләшеү. *Эштән ялтаныҧ йөрөү. Яуаптан ялтаныҧ ҡалыу.*

**ЯЛТАРТЫУ** *к.* **1.** *кар.* **ялтандырыу.** *Ситкә ялтартмай, турыға алып барыу.*

**2.** (*йәки* **һүҙ ялтартыу**) *кусм.* Һүҙҙе, фекерҙе ситкә бороу. *[Илбикә:] Атаһы! Болғаклама инде, һүҙ ялтартып, йомғаҡ осон йәшермәй генә .. тура әйт!* Х. Ғәбитов.

**ЯЛТАРЫУ** *к. кар.* **ялтаныу.** *Эштән ялтарыу.* ■ *Боландар ялтарып, бер уңға, бер һулға боролорға итеп ҡарай.* С. Кулибай.

**ЯЛТАС** *с.* **1.** Ялтырап торған, шыма. *Таҡтаның ялтас яғы.*

**2.** Сәсе ҡойолған, ялтыр. *Ялтас баш.*

**ЯЛТАСЛАНЫУ** *к.* Ялтасҡа әйләнеү, ялтас булыу. *Башы ялтасланған.*

**ЯЛТ-ЙОЛТ, ялт та йолт** *окш.* **1.** Ҡабат-ҡабат ялт итеп, балҡып киткәнде, йылтырағанды белдергән һүҙ. *Ялт-йолт итеү. Ялт-йолт килеү. Ялт-йолт йәшен йәшнәү.* ■ *Усаҡ аҫтына яғылған утын әкрен генә ялт-йолт итеп яна.* М. Ғафури.

**2.** Тиҙ генә ян-яҡҡа күҙ ташлағанды белдергән һүҙ. *Бурыл кешенләп ебәргәс, Зөлкәрнәй һиҫкәнеп .. тирә-яғына ялт-йолт ҡарап алды.* Н. Иҙелбай.

**ЯЛТЛАТЫУ** *к.* Яҡты, асыҡ итеп ҡапыл балҡытыу; ялтылдатыу. *Ялтлатып ҡылыс һелтәү.*

**ЯЛТЛАУ** *к.* Яҡты, асыҡ булып ҡапыл балҡыу. *Ел иҫте, йәшен ялтланы, күкте болот ҡапланы.* Ф. Рәхимғолова.

**ЯЛТЫЛДАТЫУ** *к. кар.* **ялтлатыу.**

**ЯЛТЫЛДАУ** *к.* Нурға сағылып уйнау, ялтлап балҡыу; ялт-йолт итеү, ялт-йолт килеү. *Ялтылдап торған ҡыҙыл яҡут таш.*

**ЯЛТЫР** *к.* **1.** Ялтлап торған; йылтыр. *Ялтыр итек. Ялтыр ҡалай. Ялтыр тауар.* ■ *Йәйрәп ятҡан ялтыр һыу өҫтөнә күҙгө кеүек ялтыр боҙ туңған.* Ғ. Амантай.

**2.** Шып-шыма, таҡыр. *[Васильевичтың] башы бик ялтыр итеп ҡырылған.* С. Агиш.

**ЯЛТЫРАҠ** *с.* Ялтырап торған, ялтыр. *Ялтырак металл. Ялтырак уйынсыҡ.*

**ЯЛТЫРАТЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **ялтыратыу.** *Ялтыратылған балдаҡ. Лак буяп ялтыратылған иҙән.*

**ЯЛТЫРАТЫУ** *к.* **1.** Яҡты итеп балҡытыу. *[Василий Иванович] көмөш һаплы ҡылысын ҡояшҡа ялтыратып, баш өҫтөнә күтәрҙе.* М. Тажи.

**2.** Асыҡ итеп күрһәтеү (аҡ төҫтәге нәмәләргә ҡарата). *Теште ялтыратып көлөү.* ■ *[Сәскә] тубыктарын ялтыратып, аягын салышырып, диванга ултырҙы.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** Эске тойғо менән балҡытыу, нурландырыу (күҙгә ҡарата). *[Егет] ҙур күҙҙәрен ялтыратып, матур киләсәкте күргән кеүек, һокланып һөйләй ине.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Ышҡып, таҙартып, буяп һ. б. юл менән ялтыр итеү. *Май һөртөп ялтыратыу. Ҡом менән ышкып ялтыратыу.*

◆ **Сикәгә ялтыратыу** *һөйл.* яңаҡҡа һуғыу, сикәләү. **Табан (йәки үксә) ялтыратыу** *кар.* **табан** [1].

**ЯЛТЫРАУ** *к.* **1.** Ялт итеп балҡыу, нур сәсеү. *Алыҫта ут ялтырай. Йәшен ялтырай.* ■ *Әле генә ҡояш ялтырап, шарлап йылғалар аға ине, төнөн буран сыкты ла китте.* Р. Солтангәрәев. / Нурға сағылып емелдәү. *Ысыҡ тамсылары ялтырай.* ■ *Ялтырап та үтә аткан сакта уҡ-һаҙаҡтың башаҡ ҡоросо* (Халыҡ йырынан).

**2.** Эске тойғонан балҡыу (күҙгә ҡарата); яныу. *Бабсаҡтың ҡатынын алам уҙемә тип,*

*Көлөмбәттең күҙҙәре ялтыраны.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**3.** *күсм.* Йөҙгә, сырайға шатлыҡ билдәһе сығыу; балҡыу. *Кешегә ялтырап тороу.* ■ *Зәлифә .. күпшы баҫып, ялтырап көлөп инде.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Тыштан ялтырай, эстән ҡалтырай** яҡшы булып күренеп, эсендә насар уй йөрөткән кешегә ҡарата әйтелә.

**ЯЛТЫРАУЫҠ** *и.* **1.** Ялтырап торған, йылтыр нәмә. *[Ҡыҙҙар] ел ҡанатлы күбәләк һымаҡ һәр бер ялтырауыҡҡа ҡыҙығыусан була.* Һ. Дәүләтшина. *[Лидия] түмбочкала ятҡан ялтырауыҡ циферблатлы ҡул сәғәтен алып ҡараны.* Ғ. Әмири.

**2.** Кейем-һалымды биҙәү өсөн тағыла торған ялтыр ваҡ тәңкә. Ялтырауыҡ баҫыу.

**3.** *һөйл.* Көршәк, сынаяҡҡа һ. б. ялатҡан махсус ялтыр иретмә. *Ялтырауыҡ ялатыу.*

**4.** *диал.* Ялтырма.

**ЯЛТЫРАУЫҠЛЫ** *с.* **1.** Ялтырауыҡ (3 мәғ.) ялатылған, ялтыр. *Ялтырауыҡлы уйынсыҡ.*

**2.** Ниндәйҙер хистән, тойғонан ялтыраған (күҙгә ҡарата). *Уның [еңгәнең] ялтырауыҡлы күҙҙәрендә йәш бөртөктәре күреп, үҙем дә тәьҫирләнеп киттем.* И. Ғиҙҙәтуллин.

**ЯЛТЫРАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **ялтырау.** *[Күлдәр] йәйрәп ятҡан ҙур көҙгө кеүек ялтырашып, юлдың әле бер яғынан, әле икенсе яғынан килеп сыға.* К. Мәргән.

**ЯЛТЫРҒАН** *и. ҡар.* **йылтырған.**

**ЯЛТЫР-ЙОЛТОР** *с.* Ялт-йолт итен ялтырап торған; ялтыр. *Ялтыр-йолтор булыу.* ■ *Ситән тишектәре арҡыры ялтыр-йолтор булып тағы ла һыу өҫтәре көмөшләнә.* Л. Ғәлимов.

**ЯЛТЫРҠА** [1] *с. диал.* Алсаҡ, ирәбе.

**ЯЛТЫРҠА** [2] *и. диал.* Йоҡа сабаҡ.

**ЯЛТЫРМА** *и.* Ялтыр ҡалайҙан балыҡ һымаҡ итеп яһап, ҡармаҡҡа таҡҡан алдатҡыс һәм шундай алдатҡыслы ҡармаҡ. *Ялтырма менән ажау тотоу.* ■ *Соңғолдоң өҫ яғына баҫып, арғы башына ялтырма ырғыттым. Көтөп ятҡан тиерһең — суртан килеп тә ҡапты.* З. Яматов.

**ЯЛУАРЫУ** *к. диал.* Ялбарыу. *Күҙ йәше менән ялуарыу. Ялуарып ғәфү үтенеү.* ■ *Күпме һораһығыҙ ҙа бирәм, ташлай күрмәгеҙ инде, тип [Шәхми карт] ялуарыуын дауам итте.* Т. Йәнәби.

**ЯЛЫНДЫРЫУ** *к.* Ялынырға, үтенергә мәжбүр итеү; инәлтеү. *Ялындырып йөрөү.* ■ *Байназар ялындырып торманы, сыңғыратып уйнап ебәрҙе.* Б. Бикбай.

**ЯЛЫНҺЫТЫУ** *к. диал.* Ялҡын, төтөн тәме индереү.

**ЯЛЫНҺЫУ** *к.* Ҡырҙа, асыҡ утта әҙерләнгән сәй, аштан һ. б. ялҡын, төтөн тәме килеү. *Ялынһыған бутҡа. Ялынһыған сәй.* / Күмһеү. *Һөт ялынһыған.*

**ЯЛЫНЫП-ЯЛБАРЫП** *р.* Бик ныҡ (ялыныу). *Ялынып-ялбарып һорау.* ■ *Иллә мәгәр был ҡыҙ йөҙөктө бирмәне, ти. Ә егет ҡыҙ артынан ялынып-ялбарып ауылға саҡлы барҙы, ти* (Әкиәттән).

**ЯЛЫНЫС** *и.* Ниҙер һораған, үтенгән мөрәжәғәт; үтенес. *Ялыныс төшөү.* ■ *[Хәжәр:] Хәҙергә, аллаға шөкөр, бер кемгә лә ялынысым юҡ. Йортомда үҙем баш, үҙем түш!* Ш. Янбаев.

● *Ярлы көнө — ялыныс.* Әйтем.

**ЯЛЫНЫСЛЫ** *с.* Ялынған хәлдәге, ҡыҙғаныс, йәл. *Ялынысլы булыу.* ■ *[Өйрәнсек] ялынысլы, меҫкен ҡиәфәт менән тимерсегә тилмереп ҡараған.* З. Биишева.

**ЯЛЫНЫУ** *к.* Түбәнселек менән ни хаҡында лыр үтенеп һорап мөрәжәғәт итеү. *Ялынып һорау.* ■ *[Аҫылбикә:] Исмаһам бынау Айтбайҙың бауыры ҡалҡманы. .. Кемгә бараһың да, кемгә ялынаһың. Ғүмеребеҙгә ялындыҡ. Ғүмеребеҙгә иҙелдек.* Т. Хәйбуллин.

● *Яҡшыға ялынһаң — малың ҡалыр, яманға ялынһаң — йәнеңде алыр.* Мәҡәл. *Яманға ялынғансы ят та яныңды ҡарма.* Әйтем.

**ЯЛЫУ** [*рус.* жалоба] *и.* Кеше йәки ойошма өҫтөнән яҙып биргән рәсми ҡағыҙ; ошаҡ. *Ялыу биреү. Ялыуҙы тикшереү. Ялыу яҙыу.* ■ *[Юлай:] Аһ, ул Твердышев!.. Бик күп тейҙе инде теңкәгә... Губернаторға мин ялыу яҙам.* Б. Бикбай. **Ялыу кенәгәһе** *һөйл.* халыҡты хеҙмәтләндергән ойошмаларҙа кешенән етешле-етешһеҙ яҡтарҙы яҙҙырыу өсөн тотолған кенәгә.

**ЯМ** [1] *и. тар.* Почта йәки юлсы йөрөгән оло юлдағы ат алыштыра торған урын. *Ям йорто.* **Ям аты** почта йөрөтөүгә ҡуйылған ат.

♦ **Ям сабыу** ялланып почта йәки кеше йөрөтөү. *Арыҫлан ҡуйған нәүбәт буйынса [ауыл кешеләре] һаҡта торалар, ям сабалар, кардонға ҡарауылға барыу кеүек хеҙмәттәр үтәйҙәр.* Ғ. Ибраһимов.

**ЯМ** [2] [*рус.* яма] *и. һөйл.* **1.** Дегет, күмер, кирбес һ. б. үртәү өсөн яһалған соҡор. *Дегет ямы. Кирбес ямы.* **Ям ултыртыу** дегет ҡыуыу өсөн махсус соҡор яһау. *Хәйрулла ям ултыртыуын да, дегет һатып йөрөүен дә ташланы. Аты менән леспромхозға эшкә инеп, күмер яндырыу мейестәренә эрҙәнә ташыу кәсебенә тотонды.* М. Тажи.

**2.** Нимәләр һалыу, һаҡлау өсөн махсус яһалған соҡор. *Силос ямы. Ямды күмеү. Ям ҡаҙыу.* ■ *Стеналарын таш менән йөҙләп дүрт силос ямы эшләттек — бер биш быуынға етер!* Д. Исламов.

**ЯМАҠ** [1] *с.* Төҫө, килбәте йәмһеҙ, күрмәлекһеҙ; киреһе матур. *Ямаҡ кеше. Ямаҡ өй. Төҫкә ямаҡ. Ямаҡ булыу.* ■ *Был кешенең бисәһе бик матур, үҙе бик ямаҡ икән, ти* (Әкиәттән).

**ЯМАҠ** [2] *и. диал. ҡар.* **ямау** [2].

**ЯМАҠАЙ** *с.* **1.** *ҡар.* **ямаҡ** [1]. *Ямаҡай кеше. Ямаҡай өй. Ямаҡай булыу.* ■ *Шәғәли уны [ҡатынды].. бисәлеккә ала. Байлығы булғас, уҙып барған йәшенә лә, төҫкә ямаҡайлығына ла ҡарап тормаған инде ул.* Б. Бикбай.

**2.** *ҡар.* **яман.** *Ямаҡай юл. Ямаҡай булыу.*

**ЯМАЛ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* **1.** Матурлыҡ, һылыулыҡ, сибәрлек. // *Ямал булыу.* ■ *Һин, Ямалетдин, ямал таптың Бәләбәйҙә лә һин шөһрәт алдың..* Ш. Бабич.

**2.** (*баш хәреф менән*) Ҡатын-ҡыҙ исеме.

● *Мөхәббәт ямал теләмәҫ.* Әйтем.

**ЯМАЛЫУ** *к. төш. ҡар.* **ямау** [1]. *Ямалған итек. Ямалған салбар.*

● *Батыр яраһы яуҙа ямалыр.* Әйтем.

**ЯМАН** *с.* **1.** Булмышы, асылы, сифаты, йөкмәткеһе һәйбәт, яҡшы түгел; насар. *Яман гәҙәт. Яман уй. Яман төш. Яман һүҙ. Яман булыу.* ■ *[Әбей:] Бер уйлаһаң, эшләгән эшең яман түгел, улым.* Т. Йәнәби. *Ҡыйыҡ уҡ атҡан менән тура китмәҫ, күңелдән яман һүҙҙең коро китмәҫ.* Аҡмулла.

**2.** Зыян килтерә торған; уҫал, яуыз, боҙоҡ, насар. *Яман кеше.* ■ *Яман әҙәм билдәһе: асыу менән үҫе күп* (Ҡобайырҙан).

**3.** Күңелгә ҡурҡыу тойғоһо биргән, ҡурҡыныс уятҡан. *Яман тауыш.* ■ *Ауылдың Муйыллы йылғаһы аша яланга үтеп йөрөй торған ере яман һаҙлыҡ булған.* Б. Бикбай. *Күҙҙәре ҡайнай йәһәннәмдән яман.* Ш. Бабич.

**4.** *р. мәғ.* Ифрат, бик. *Яман көслө. Яман уҫал. Иген яман уңған.*

◆ **Яман күреү** яратмау. **Яман рәнйеү** *диал.* быума. **Яман шеш** *ҡар.* **шеш** [2] 2.

● *Айыу ҡашҡа булмаҫ, яман яҡшы бушмаҫ.* Мәҡәл. *Ярлының аҡсаһын яман тауар бөтөрә.* Мәҡәл.

**ЯМАН-АРТАҠ** *и. йыйн.* Төрлө яман зат. *Яман-артаҡтан һаҡ булыу.* ■ *Был ике быҙау һис һыу-һүлгә эләкмәй, ҡош-ҡортҡа осрамай, яман-артаҡҡа тотолмай .. Уралға барып сыҡҡан.* «Ҡуңыр боға».

**ЯМАНАТ** *и.* Яманлыҡ менән танылған исем. *Яманатҡа ҡалыу. Яманатты юйыу.* ■ *[Йәнгәле:] Егет улһә, яманаты түгел, мәңге һөйләрлек даны ҡайтҡан.* С. Агиш.

◆ **Яманатты һатыу** кемделер ғәйепләп, кеше араһында яманлап һөйләү; исемен сығарыу.

● *Ялған даның таралғанса, яманатың таралһын.* Әйтем.

**ЯМАНАТЛЫ** *с.* Насарлыҡ менән танылған; ғәйепле. *Яманатлы булыу.* ■ *[Аҡназар:] Һин, ҡустым, юкка аҙапланаһың .. Ҡуй, үҙеңде яманатлы итмә. Тукмарҙар.* Я. Хамматов.

**ЯМАНЛАУ** *к.* Яман итеп күрһәтеү; насарлау, хурлау. *Яманлап йөрөү. Яманлап һөйләү. Яманлап яҙыу.* ■ *[Әхәт:] Һеҙ беҙҙең яҡты яманлап яҙмағыҙ инде. Шәп бит ул беҙҙең район.* Р. Солтангәрәев. *Арғымаҡты яманлап, толпарҙы ҡайҙан табырһың, ағай-энеңде яманлап, яҡынды ҡайҙан табырһың* (Ҡобайырҙан). **Яманларлыҡ түгел** насар түгел; арыу. *[Ғамир:] Аттар беҙҙең .. яманларлыҡ түгел.* Б. Бикбай.

◆ **Яманлап йөрөйһөң** ашап-эсеп бөтөүгә генә килеп ингән кешегә әйтелә.

● *Ата-әсәһен яманлаған ят дошманға тап булыр.* Мәҡәл.

**ЯМАНЛАШЫУ** *к.* Үҙ-ара мөнәсәбәтте боҙоу; асыуланышыу. *Яманлашып йөрөү.* ■ *Ауылдаштар менән яманлашып та, эрләшеп тә бөтөргә тура килә.* Р. Солтангәрәев.

**ЯМАНЛЫҠ** *и.* Төрлө яман эш, насарлыҡ. *Яманлыҡ эшләү.* ■ *Кешенән күргән яҡшылыҡ та, яманлыҡ та [Емештең] күңелендә йәшәй бирә.* З. Биишева.

● *Яҡшы кешенең яҡшылығы тейер тар ерҙә, яман кешенең яманлығы тейер һәр ерҙә.* Мәҡәл.

**ЯМАНТАЙ** *с. диал.* Яман, насар.

**ЯМАНҺЫУ** *с.* Күңелгә ауыр; күңелһеҙ, моңһоу. *Яманһыу булыу.* ■ *Рәхәт ине бергә торған саҡтар, айырылышыу бигерәк яманһыу.* М. Ғафури. // *Аяныс йәшлеген иҫләүҙән күңеле тулған Хөббөниса ауыр, бик яманһыу күрһөндө.* Я. Хамматов.

**ЯМАНҺЫУЛАТЫУ** *к.* Моңайтыу, бойоҡтороу, күңелһеҙләндереү. *Иҫтәлектәрҙең тулҡынландыра торғандары ла осрай, яманһыулата торғандары ла бар.* Д. Исламов.

**ЯМАНҺЫУЛАУ** *к.* Юҡһынып, һағынып бойоғоу; моңайыу, күңелһеҙләнеү. *Һибәт ағай яңғыҙы йөҙтүбән төшөп ятҡан, ул да минең кеүек йоҡоһоҙ, беҙҙе һағына, яманһыулай.* Д. Юлтый. *Яманһыулай күңел йырҙар тыныр, бушап ҡалғас киске урамдар.* Р. Бикбаев.

**ЯМАНЫУ** *к. ҡайт ҡар.* **ямау** [1]. *Яманып ултырыу.*

● *Ярлы яманыр ҙа кыуаныр.* Әйтем.

**ЯМАТАЙ** *с. диал.* Яман.

**ЯМАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ямау** [1]. *Кулдәкте яматып алыу. Итекте яматыу.*

**ЯМАУ** [1] *к.* Кейем-һалым һ. б. нәмәнең туҙған, тишелгән ерен берәй нәмә менән ҡаплап тегеү, йәбештереү. *Быйма ямау. Кулдәк ямау. Өҫ-башты ямау. Ау ямау. Самауыр ямау.* ■ *[Әбей] кейем-һалымын рәтләп,.. йыртыҡ урындарын ямай.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЯМАУ** [2] *и.* Туҙған, тишелгән ерҙе бөтәйтер өсөн һалған нәмә киҫәге. *Ямау һалыу.*

◆ **Ҡырҡ ямау** бик алама кейемгә ҡарата әйтелә. **Ямауы өҫтөндә** тән яраһының ҡурҡыныс түгеллеген билдәләп әйтелә. *Ямауы өҫтөндә, йүнәлер әле.*

● *Тугыҙ ямауы булһа ла, тун булһын.* Әйтем.

**ЯМАУЛЫ** *с.* Ямау һалынған, ямауы бар. *Ямаулы кейеҙ. Ямаулы итек.* ■ *Әхмәттең өҫтөндә — аҡбурға, майға, мәтегә буялған .. ямаулы салбар.* С. Агиш.

**ЯМАУЛЫҠ** *и.* Ямау өсөн тәғәйенләнгән туҡыма киҫәге. *[Әсәйем:] «Ямаулыҡ та юк, исмаһам»,— тип, тегә иҫке һандыкты асып, ундағы иҫке-моҫко сепрәктәрҙе актара, унан берәр ямаулыҡ табып эшкә тотона.* М. Ғафури.

**ЯМАШ** [1] *и.* Турғайҙар ғаиләһенә ҡараған ҡыҙыл түшле, бәләкәй кәүҙәле һайрар ҡош.

**ЯМАШ** [2] *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме (бөрйән ырыуына ҡарай).

**ЯМАЯҠ** *и. диал.* Туҫтаҡ.

**ЯМБ** [*рус.* ⟨ *гр*] *и. әҙб.* Силлабо-тоник шиғырҙағы баҫымы икенсе ижекҡә төшкән ике ижекле стопа. *Ямблы шиғыр.*

**ЯМҒЫР** *и.* Болоттарҙан һыу тамсылары рәүешендә яуа торған атмосфера яуым-төшөмө. *Еләләп яуған ямғыр. Ҡойма ямғыр. Ямғыр болото. Ямғыр күҙе. Ямғыр яуыу.* ■ *Күк күкрәтеп ямғыр яуа. Аяҡ аҫты лас-лос итеп тора, өҫтән ҡар ҡатыш ямғыр яуа.* Х. Ғиләжев. *Күҙ камаштыргыс ялҡын балҡыны, тирә-йүндә дер һелкетеп күк ишелде һәм ҡойоп ямғыр яуа башланы.* А. Абдуллин. **Баҫма ямғыр** *шул уҡ* **быҫҡаҡ ямғыр.** **Быҫҡаҡ ямғыр** һибәләп кенә оҙаҡ яуған ваҡ күҙле ямғыр. **Ләйсән ямғыр** яҙғы тәүге ямғыр. *Яҙ килә, матур ай килә .. йылы елпәҫ ҡанат килеп, ләйсән ямғыры һибеп.* ♧ Игебаев.

◆ **Ямғыр туп** *ҡар.* **туп** [1].

● *Бер ағастың шаулауы илгә ямғыр килтер-*

*мәҫ.* Әйтем. *Буран булһа, һунар юк, ямғыр булһа, туҙан юк.* Әйтем. *Яҙғы ҡарҙы ямғыр йыуа.* Әйтем. *Ямғыр яуҙы тип яуҙан ҡалма.* Әйтем.

**ЯМҒЫРЛАУ** *ҡ.* Ямғыр яуып тороу, ямғырлы булыу. *Көндәр ямғырлап тора.*

**ЯМҒЫРЛЫ** *с.* Ямғыр яуып торған, ямғыр йыш яуған. *Ямғырлы көҙ. Ямғырлы йыл.* ■ *Ҡыр эштәре күптән бөттө. Ҡара һыуыҡ елле, рәшкы ҡатыш ямғырлы көндәр башланды.* М. Тажи.

**ЯМИҒ** [*ғәр.*] *и.* Оло мәсет. **Ямиғә шәриф** пәйғәмбәр нәҫелдәренең мәсете. *Әлекке ваҡытта «Сәйлун» сәйенән ямиғе шәрифтәр төшөрөлгән һүрәттәр сыға торғайны.* Ғ. Хәйри.

**ЯМИН: ямин намә** [*фарс.*] ант яҙылған ҡағыҙ. *Мулла ҡулына бер ҡағыҙ алып: «Хәҙер ямин намә уҡыйым, һеҙ ҙә минең арттан уҡып барығыҙ»,— тине.* М. Ғафури.

**ЯМСЫ** *и. тар.* Ям атын йөрөткән кеше.

● *Уҙған ямғыр артынан ямсы менән сапмайҙар.* Әйтем.

**ЯМУРТАЙ** *и. этн.* Туйға кейәү егет алып килгән күстәнәс әсемлек (ҡымыҙ, бал, буҙа һ. б. ҡарата). / Кейәү егеттең бажаһын һыйлау өсөн килтергән күстәнәс әсемлеге. *Балдыҙҙың ямуртайын эсергә килгәндәр.*

**ЯМҺАҠЛАУ** *ҡ. диал.* Һаҡлау, яҡлау.

**ЯН** [1] *и.* **1.** Уҡ атыу өсөн бөгөп кереш тартҡан боронғо уҡ атыу ҡоралы; йәйә. *Мөгөҙ ян. Ян керешен тартыу. Уҡ көҙрәте ян керешендә, ир ғәйрәте ил кәңәшендә.* Х. Назаров. *Яндар ҙа тарттым, уҡ аттым, беләкәйем ергә таяныпl* (Халыҡ йырынан). **Мөкәтә ян** керешен бүре тарамышынан тартып яһаған ян. **Әҙернә ян** нке яҡ башын мөгөҙҙән ҡуйып, керешенә бүре тарамышы тартҡан ян. **Һанай ян** ябай ян.

**2.** Ағастан бөгөп, тарамыштан кереш тартып яһаған йөн теткес. *Янды муйыл ағасынан яһайҙар. Ян менән йөн тетеү.*

**ЯН** [2] *и.* **1.** Кемдеңдер, нимәнеңдер яҡын тирә яғы, эргәһе. *Өй яны. Урман яны. Янда йөрөү. Янға килеү.* ■ *Йәнтимер урынынан ҡуҙғалды һәм бик эшлекле ҡиәфәт менән беҙҙең янға килде.* С. Агиш.

**2.** Кем йәки нимәнеңдер уң һәм һул яҡ эргәһе, йәнәш яҡ (ал һәм арт яҡҡа ҡаршы). *Янға ултырыу. Янда ятыу.*

**3.** *с. мәғ.* Шул яҡта булған, шул яҡта урынлашҡан. *Ян кеҫә. Ян ҡапҡа. Ян тәҙрә.* ■ *Арыҫланғәле ян кеҫәһенән ҡағыҙ, ҡәләмен алып өҫтәлгә һалды ла һөйләй башланы.* Ғ. Дәүләтшин. **Ян һике** өйҙә ҙур урындыҡтан бәләкәй итеп эшләнгән һике; бәләкәй һнке. *Әле ян һике яҡ тәҙрә ватылғайны..* Н. Ҡәрип.

◆ **Янда йөрөтөү** үҙең менән бергә алып йөрөү. *Документты янда йөрөтөү.* **Янда ҡалыу** тотонолмай, үҙеңдә ҡалыу, үҙеңә булыу. *Янда ҡалған аҡса.* **Янда тотоу** үҙең менән бергә йәшәтеү. *Балаларын барыһын да янында тота, ситкә ебәрмәй.*

● *Ятҡа ялынғансы ят та яныңды һәрмә.* Әйтем.

**ЯНАҒА** *и. диал.* Ҡәйнеш.

● *Ҡайнаға ҡарт ир, янаға ярты ир.* Мәҡәл.

**ЯНАП** *и. ҡар.* **йәнәп.**

**ЯНАР** *с.* Яныуға һәләтле булған, яна торған. *Янар газ. Янар шыйыҡлыҡ.*

**ЯНАРАЛ** [*рус.* генерал] *и. иҫк. ҡар.* **генерал.** *Әрменең башында Перовский тигән янарал баш булған, ти.* М. Буранғолов.

**ЯНАРТАУ** *и.* Түбәһендәге кратерынан ваҡыт-ваҡыт ирегән ҡайнар матдә, газ, тау тоҡомдары атылып торған осло тау; вулкан. *Янартау атылыу.* ■ *Михара вулканын Токионыҡы тиҙәр. Шуның өсөн был янартауға айырыуса иғтибар менән ҡарайҙар.* К. Мәргән.

**ЯНАУ** *ҡ.* Насарлыҡ эшләү, үс алыу тураһында алдан ҡурҡытып, иҫкәртеп әйтеү. *[Атайым:] «Бөгөн булмаһа, иртәгә боғаҙығыҙҙан алырбыҙ»,— тип кемгәлер янай.* Д. Юлтый. / Ҡурҡытыу ишараһы яһау. Йоҙроҡ янау. ■ *[Шәмси:] Әйттерермен әле мин һиңә, онотма! — тип бармаҡ янаны ла китеп тә барҙы.* Ш. Насыров.

**ЯНАУЫЛҒА** *р. диал.* Йәнәсыҡҡа.

**ЯНАШ** *и. диал. ҡар.* **йәнәш** [1].

**ЯНАШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **янау.**

**ЯНБАШ** *и.* Арт һандың ике яҡ янға сыҡҡан өлөшө. *Уң янбаш. Һул янбаш. Янбаш һөйәге.* ■ *[Ҡатын] Бөйрәкәйҙең янбашынан тупылдатып һөйҙе.* Ш. Янбаев.

◆ **Янбашына күнәк элерлек** бик ябыҡ (малға ҡарата). *Атлыҡса тишек-тошоҡ, һыуыҡ, ел уйнай. Аттарҙың янбашына күнәк элерлек.* Б. Ишемғол.

**ЯНБАШЛЫҠ** *и.* Ышлыяның һыртлыҡтан ике янбаш аша төшөп, буйлыҡҡа тоташҡан ҡайышы.

**ЯНҒАЛАҠЛАУ** *ҡ.* Эргәгә яҡын килеү; яҡынлау, һырлығыу. *Бисәһе Умыстың еңеү сәбәбен һорап, тағы янғалаҡлай башланы, ти* (Әкиәттән).

**ЯНҒЫН** *и. ҡар.* **ут** [1] 3.

**ЯНДАР** *и. һөйл.* Кемделер һаҡлап, ҡурсып, янында йөрөгән кеше; һаҡсы.

**ЯНДАУ** [1] *и.* **1.** Ныҡлыҡ өсөн, оҙон күкрәкле арбаның аҫҡы үрәсәһенә буйлатып, ҡуша сырмап ҡуйған йоморо ағас.

**2.** Аяҡ орсоғоноң табалдырығын ҡанатына тоташтырған ағас. *Аяҡ орсоғоноң ҡанаты, баҫҡысы, табалдырығы, яндауы була.*

**ЯНДАУ** [2] *и.* Бер сирек самаһы нәмә һыйышлы ағас һауыт, көбө. *Һөт һыуығас, ҡаймағын һөҙөп алалар ҙа, яндауҙа бешеп, аҡ май яһайҙар.* Я. Хамматов. *«Их тәмле икәнl» — тине Зәбир, яндауҙы күтәреп, айранды татып ҡарағас.* Н. Мусин.

**ЯНДАУЫР** *и.* **1.** Ныҡ тоттороу өсөн нимәнеңдер эргәһенә ҡуйылған буй терәк. *Баҫҡыс яндауыры. Баҫма яндауыры.* ■ *Кәмәгә ҡуйылған яндауыр гәҙәттә йыуан була.* Т. Морат.

**2.** Һаламы ҡойолмаһын өсөн ҡыйыҡ ситенә ҡуйылған ағас. *Яндауыр ҡуйыу.*

**3.** Кәмә ауамаһын өсөн, ҡабырғаһынан тоташтырып, йөҙҙөрөп ҡуйған йыуан буй ағас.

**ЯНДАШ** [1] *р.* Эргәләш. *Яндаш ултырыу.*

**ЯНДАШ** [2] *и. диал.* Дуҫ. *Яндаш булыу. Яндаш итеү.*

**ЯНДЫРАЙ** *с.* **1.** Тиҙ генә ҡыҙып барыусан. *Яндырай кеше. Яндырай булыу.* ■ *Эдуард үҙе бик яндырай. Юҡ кына нәмәә өсөн ҡыҙа ла китә торған малай.* Б. Бикбай. / Юҡҡа ғына көйөп, борсолоп, ҡайғырып китеүсән. *Ул [Сәхиулла] ..*

*янып-көйөп йөрөүсән кеше булып, «яндырай» кушаматы шуға бирелгән ине.* Й. Солтанов.

**2.** Эшкә алдан башлап йөрөргә яраткан, ихлас, дәртле. *Нурийән .. баяғы ташты һә тигәнсе онтаклап ташланы. Ай-һай! Бигерәк яндырай егет икәнһең! .. — тине ҡыҙ.* С. Кулибай.

**ЯНДЫРАЙЛАНЫУ** *ҡ.* Тиҙ генә ҡыҙып барыу, ҡайғырыу, көйөү; көйәләнеү. *Мин инде ни эшләргә белмәй, яндырайланып йөрөйөм. .. Идаралыҡҡа шылтыратып ҡарайым, бер кем юҡ.* Р. Солтангәрәев.

**ЯНДЫРҒЫС** *с.* Яндыра торған. *Яндырғыс бомба. Яндырғыс шыйыҡса.*

**ЯНДЫРЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **яндырыу.** *Яндырылған күмер.* ■ *Беҙ фронт буйынса Польша, Белоруссия .. ауылдарын үттек. Ашлыҡтары сабылған, ауылдары яндырылған, таланған.* Д. Юлтый.

**ЯНДЫРЫУ** *ҡ.* **1.** Утта көйрәтеү. *Ағас яндырыу.* ■ *Емерҙек, яндырҙыҡ һарайҙарҙы .. диуарға һөйәнек дошмандарҙы.* Б. Ишемғол. / Утта ҡыҙҙырып сыныҡтырыу; үртәү. *Кирбес яндырыу.*

**2.** Утлы итеү, тоҡандырыу. *Мейесте яндырып ебәреү. Шәм яндырыу.*

**3.** Эҫе нәмәгә тейҙереп, әрнетеү. *Ҡулды яндырыу.* / Ҡыҙыу һауанан һ. б. тән ҡыҙып эҫе булыу. *Мунса сабынып сыҡҡандағы һымаҡ яндырып, күлдәктәрҙе тәнгә йәбештерҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Дымлы көйө өйөп, ҡыҙҙырыу, серетеү. *Бесәнде яндырыу.* ■ *Келәткә сей ашлыҡ һалып, уны боҙорға, яндырырға хаҡыбыҙ юҡ.* З. Ғәлимов.

**5.** Сабып, шәп йүгертеп, ныҡ тирләп килгән атҡа һыуыҡ һыу эсереп зыянлау, эштән сығарыу. *Ҡупкаҡ ҡуян ҡулға алһа теҙгенде ил толпарын бәйге сапмай яндырыр.* Й. Солтанов.

**6.** *күсм.* Мөхәббәт хисе уятып эске кисерештәргә һалыу, әрнетеү. *Йөрәкте яндырыу.*

♦ **Күҙҙе яндырыу** асыу, нәфрәт һ. б. тойғо менән күҙҙе ныҡ ялтыратыу. *Хәби бай упайған күҙҙәрен яндырып Сурағолға әйләнде.* Т. Хәйбуллин. **Ҡара яндырыу** [сәйҙе] күп һалып бешереп, ныҡ ҡаты итеү. *Ҡара яндырып сәй эсеү.* ■ *Әбей электән дә ҡуйы сәйгә услап сәй өҫтәне лә ҡара яндырып һыйһай башланы.* Ә. Вахитов. **Эсте яндырыу** көнләштереү, көнсөллөгөн килтереү. *Фатиманың колхозда тиҙ арала таныла башлауы Ғариф карттың эсен яндыра башланы. «Ҡара һин уны, үҙенә күрә түгел, ялбыр баш»,— тип уйланы ул.* Б. Бикбай.

● *Көн күрмәгән көн күрһә, көндөҙ сыра яндырыр.* Мәҡәл. *Ялған яндырыр, яманатҡа ҡалдырыр.* Мәҡәл.

**ЯНДЫРЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **яндырыу.** *Ут яндырышыу.* ■ *[Йылҡыбай Зөһрәгә:] Мин ул мәлгүн бәрейҙең кәүҙәһен үҙем яндырыштым.* «Алдар менән Зөһрә».

**ЯНИ** [*ғәр.*]. *и. иҫк. кит.* Енәйәтсе, хыянатсы. *Гөнаһлылар, яниҙар доньяһы был, торалар меҫкенлек, зилләт эсендә.* М. Ғафури.

**ЯНИБ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Яҡ, тараф.

**ЯНКИ** [*рус.* ‹ *ингл.*] *и.* АҠШ-та тыуған американдарҙың ҡушаматы.

**ЯНЛАТЫУ** *ҡ.* Ниҙеңдер янына яҡынлатыу; яҡын итеү, эргәләтеү. *Янлатып үтеү. Янлатып ҡуйыу.* ■ *Уға янлатып терәп бик бәләкәй генә бер өй һалынған.* Т. Хәйбуллин.

**ЯНЛАУ** *ҡ.* **1.** Ниҙеңдер янынан хәрәкәт итеү; эргәләү. *Ярҙы янлап барыу.* ■ *Һәүбән янлап ҡына барғанда, һиҙҙермәй генә теге ҡыҙҙың сәсенән урап тотҡан.* «Аҡбуҙат».

**2.** Бүрәнәне ике яғынан сабып юныу. *Бүрәнә янлау.* ■ *[Ғильман килененә:] Ҡамытҡа тигән бер ағас янлап ҡалдырғайным, йыбанмаһаң, шуны күтәрешсәле.* Я. Хамматов.

**ЯНСЫ** *и.* Ян яһаусы. *Янсы булыу.* ■ *Уҡтарҙың береһен алып, шуға ҡарап яңы уҡтар яһатыу өсөн Салауат янсы Борнаш янына китте.* Н. Иҙелбай.

**ЯНСЫҠ** *и. этн.* Аҡса, тәмәке һ. б. нәмәләр һалыу өсөн ауыҙын бөрмәле итеп теккән бәләкәй тоҡсай (ғәҙәттә туйҙа яңы төшкән килен ҡәйнештәренә тарата). *Күн янсыҡ. Суклы янсыҡ. Янсыҡ бүләк итеү. Янсыҡ тегеү. Янсыҡ сигеү.* ■ *Юлсы кеҫәһенән тәмәке янсығы сығарып, тәмәке төрә башланы.* А. Карнай. *[Егет ҡушаматтары:] Бына суклы ҡуш һырға ҡыҙығыҙ янсыҡ теккәнме? Әсәһенә ҡуш яулыҡ, ҡыҙығыҙ билбау сиккәнме.* М. Буранғолов.

● *Йәйәүлегә янсыҡ та ауыр.* Әйтем.

**ЯНТАҒАЙ** *с.* Бер яҡҡа ауыш; ҡырын. *Янтағай юл.*

**ЯНТАЙТЫУ** *ҡ.* Бер яҡҡа ҡыйшайтыу. *Кәүҙәне янтайтыу. Сананы янтайтыу.*

**ЯНТАЙЫУ** *ҡ.* Бер яҡҡа ҡыйшайыу; ауышыу. *Янтайып ултырыу.* ■ *Бына бер мәжлес. Иң түрҙә терһәге аҫтындағы мендәргә янтайып, урман ҡарауылсыһы ултыра.* Х. Атанғолов. *Арба янтайып лып ултырҙы, соҡорға тулған һыу күсәрҙән аша һуҡты..* М. Тажи. / Ҡапыл ситкә тартылыу; тайшаныу. *Ромашка ишектән сығып килгән Гөлгөнәне осратты ла ситкә янтайҙы.* Ш. Янбаев. *Януар яман үкереп,.. өҫтөмә ауа башлағанда ғына янтайып өлгөрҙөм.* «Зөһрә менән Алдар».

**ЯНТАЙЫШЫУ** *ҡ. урт. ҡар.* **янтайыу.** *Нисек етте шулай корошторoп ҡуйылған бүрәнәләр ян-яҡҡа янтайышҡан.* Т. Килмөхәмәтов.

**ЯНТАРЫУ** *ҡ. диал.* Янтайыу.

**ЯН-ТИР** *и. диал.* Йән тир. *Ян-тиргә батыу.* ■ *Хатты руссаға әйләндереү Биктимергә ай-һай ауыр булды, ян-тиргә төштө ул.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЯНТЫҠ** [1] *с.* Бер яҡҡа ауыш; ҡырын. *Янтыҡ юл. Янтыҡ өй.* ■ *Янтыҡ, емерек өйлө ауылымдан, киндер токто тағып арҡаға сығып киттем.* Б. Вәлит.

**ЯНТЫҠ** [2] *и. диал.* Ян, янбаш.

**ЯНТЫРЫҠ** *и. диал. ҡар.* **яндау** [1] 1.

**ЯНУАР** [*фарс.*] *и.* **1.** Ҡырағай хайуан. *Януар которонoп ерҙе тырнай, үҙәккә үткес итеп үкеренә башлай.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *Яман ғына тауҙа януарҙар: айыу, болан, мышы, ҡоралай* (Халыҡ йырынан).

**2.** *күсм.* Уҫал, аҫау (малға ҡарата). *Ҡара кир януарының аяҡ тауышы бер көнлөк юлдан шунда килә икән.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ЯНУТ** *и.* **1.** Ағасҡа оҫта үрмәләй торған ҡараһыу һары төҫтәге ҡуйы йөнлө бәләкәй йыртҡыс

йәнлек. *Ғәфиәт .. ҙур бүрек кейгән. Пальтоһының яғаһы ла, бүрке лә янут тиреһенән.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *с. мәғ.* Шул йәнлектең тиреһенән тегелгән. *Янут бүрек.*

**ЯНФАРМАН** *и. кар.* **йәнфарман.** *Янфарман сабыу.*

**ЯНҺАҠ** *с. һөйл.* Кешегә яҡынлап, һырлығып барыусан. *Янһаҡ бала.*

**ЯНҺАРЫ** *и.* Бер башҡорт ырыуының исеме (бөрйән ырыуына инә).

**ЯНҺАУ** *к.* Эргәгә яҡын килеү; яҡынлау, һырлығыу. *Бынау бала иркәләп янһаны ла китте.*

**ЯНҺЫУ** *к.* Янған еҫ сығарыу. *Май янһый башланы, утты кәметергә кәрәк.*

**ЯНШАҠ** *с. диал.* Мыжыҡ, бәйләнсек.

**ЯНШАУ** *к. диал.* Мыжыу.

**ЯНЪЯЛ** [*фарс.*] *и.* Күмәк талаш; ғауға. *Янъял ҡуптарыу. Янъял сығарыу.* ■ *Ҡайҙа ул берлек, татыулыҡ .. сыҡты янъял үҙ-ара.* М. Ғафури.

**ЯНЪЯЛЛАШЫУ** *к.* Күмәкләп нык талашыу; ыҙғышыу, ғауғалашыу.

**ЯНЪЯЛСЫ** *и.* Янъял ҡуптарыусы. .. *Байҙың оло ҡатыны ғәйбәтсе. [Ғәбиҙә] бик үҫал, ҡомһоҙ, янъялсы бисәкәй.* И. Ғиззәтуллин.

**ЯНЫЙ** *и. һөйл.* Һөйгән йәр, йәнәш, яратҡан кеше.

**ЯНЫП-БЕШЕҮ** *к.* Әҫәлектән бик нык тирләү; бешегеү. *Вәли ҡулаҡ янып-бешеп түргә менеп алған да, еңе менән тирен һөртөп ултыра.* Б. Ишемғол.

**ЯНЫП-КӨЙӨҮ** *к.* Бик нык борсолоп, нык ҡайғырыу. *Янып-көйөп йөрөү.* ■ *Яныҡ-көйөп, бәғерем өҙгөләнеп, ләғнәт уҡыйым, кемгә — белмәйем.* Ш. Бабич.

**ЯНЫУ**[1] *к.* **1.** Ут тәьҫиренә бирелеп юҡҡа сығыу; утта көйрәү. *Яна башлау. Яныу бөтөү.* ■ *Ҡайын түмәрҙәре төтәп ятты-ятты ла ҡапыл ялҡынланып яныу китте.* Я. Хамматов.

**2.** Уты булып, көйрәп тороу. *Күмер яныу ята, һүнмәгән. Мейес яныу ята.*

**3.** Әҫе нәмәгә тейеп бешеү, көйөү. *Ҡуҙға баҫып табаны янған. Утҡа ҡулын яндырҙы.*

**4.** Етлекмәгән йәки дымлы көйө баҫылып ятыуҙан нык ҡыҙып сереү, боҙолоу. *Иген яныу. Кәбәндә бесән янған.* ■ *Миңә рәхәт: күктән ҡояш йылыта, ә аҫтан яна башлаған тиреҫ йылыһы бәрә.* Ғ. Ғүмәр.

**5.** Шәп, ҡыҙыу сабып, нык тирләп ҡапыл һыу эсеүҙән зыянланыу, нык ауырыу (йылҡы малына ҡарата). *Александр саптырып Өфөгә .. бик шәп килгәнлектән күк ат арып, сәсәп, яныу үлде.* «Батыршаның хаты». *Ат янһа, бер биҙрә һөттө һалҡын баҙға ҡуйып һыуытып шуны эсерәләр, һуңынан андыҙ тамыры ҡайнатып эсерәләр* (Хикәйәттән). / Нык эсеүҙән ҡаты ауырыу. *Яныу үлеү.* ■ *[Мариянның] ире эскелеккә һалышып, яныу үлгән.* Д. Исламов.

**6.** Ауырыу һ. б. сәбәптән эҫе, ҡайнар булып тороу (тәнгә ҡарата). *Яныу ауырыу. Тәне ут һымаҡ яна.* ■ *Шулай бер мәл яныу башым ауыртып кәйефһеҙләнеп киттем.* Х. Түләкәев. / Ҡан төшөүҙән һ. б. ҡыҙарыу йәки эҫе булып тороу. *Битем яна.* ■ *Беҙ өйгә ҡайтырға сыҡҡанда минең аяҡ табандарым ут кеүек яна ине.* З. Хисмәтуллин. / Ҡыҙыу һауанан һ. б. тән ҡыҙыу. *Мунса эҫе, мин яндым.*

**7.** Оҙаҡ ҡулланыуҙан, нык ҡыҙыуҙан боҙолоу. *Лампочка янған. Үтек янған, эшләмәй.*

**8.** *күсм.* Ҡояш нурынан ҡыҙарыу, ҡарайыу. *Ҡояшта яныу. Тән яныу. Ҡояшта яныу ҡарайыу.*

**9.** *күсм.* Нык һуғылыу, ҡағылыуҙан көйгән һымаҡ булып ҡарайыу, ҡыҙарыу. *Утлы тимер булып баҫа ләмкәләр, буй-буй янған эҙҙәр ҡала елкәлә.* Х. Ғиләжев. **Ҡара яныу** нык өйкәлеп ҡап-ҡара булып тороу. *Итекте сисеп ҡарағас үс төбөндәй ҡара яныу сыҡҡан урыны күренде.* Д. Юлтый.

**10.** *күсм.* Нур сәсеп яҡтыртып тороу, яҡтылыҡ таратыу. *Урам мөйөшөндә тоноҡ ҡына булып электр лампаһы яна.* С. Агиш. *Күктә тиһәң меңмең йондоҙ ем-ем яна.* Н. Нәжми. / Баҙлап, нык ялтырап тороу (сағыу төҫтәргә, ялтыр нәмәләргә ҡарата). *Ул [Сыртланов] түш кеҫәһенә яныу торған ҡыҙыл яулыҡ ҡыҫтырған.* С. Агиш. *Иң башында — шинель һәм түшендә ниҙер яна — ордены буғай.* Ғ. Сәләм.

**11.** *күсм.* Көслө тойғо, хис кисереү. *Һөйөү менән яныу. Нәфрәт менән яныу. Халыҡ өсөн яныу. Шатлыҡ менән яныу.* ■ *Ул яна, тик ҡайғырып янмай, яна шатлыҡ менән.* Ш. Бабич. / Нимәгәләр нык бирелеп, көслө дәрт, ҙур теләк менән башҡарыу. *Яныу йәшәү. Яныу эшләү.* ■ *Ил карттары ни тиҙәр? Яныу йәшә һин тиҙәр.* А. Игебаев.

**12.** *күсм. һөйл.* Ниндәйҙер бер эш эшләгәндә аҙағына алып барып сығара алмай уңышһыҙлыҡҡа осрау; фаш ителеү.

◆ **Күҙ яныу** асыу, нәфрәт, һөйөү, көслө дәрт һ. б. тойғо менән күҙ нык ялтырау. *Күҙе яныу тора.* ■ *Айбулаттың күҙҙәре янды, урынынан һикереп торҙо.* Һ. Дәүләтшина. *Ай ҡыҙҙары, ҡыҙҙары, яныу тора күҙҙәре* (Халыҡ йырынан). **Эс яныу** нимәгәләр көйөнөп нык әрнеү, хәсрәтләнеү. *Рәхимәнең был серлелектән эсе янды. «Эй илаһым, был донъяла ниҙәр генә күбып ята икән, мин генә белмәйем», тип уйланды.* Һ. Дәүләтшина.

● *Бер ағас мейестә лә янмаҫ, ике ағас далала ла һүнмәҫ.* Мәҡәл. *Кем итәгенә ут төшһә, шул яна.* Мәҡәл.

**ЯНЫУ**[2] *к.* Бысаҡ, ҡылыс һ. б. ҡоралдарҙы ышҡып үткерләү; йөҙөн килтереү, йөҙөн сығарыу. *Бәкене ҡайышҡа яныу. Бысаҡты ҡаҙан ситенә яныу.* ■ *Моталлап бабай тәүҙә салғыһын .. сүкене, ентекләп ҡайраны, болондо яңғыратып яныу ебәрҙе.* Р. Ғабдрахманов. *Саңҡ-саңҡ итеп салғы яный егет һыу буйҙарында.* Ғ. Әмири.

**ЯНЫУ**[3] *к. диал.* Янау.

**ЯНЫУ**[4] *и. диал.* Яныуыс.

**ЯНЫУ-КӨЙӨҮ** *к.* Нык ҡайғырыу, борсолоу. *Яныу-көйөп һөйөү. Яныу-көйөп йөрөү.* ■ *Гөлйөҙөм дә .. яныу-көйөп йәйҙе үткәргән.* Һ. Дәүләтшина. *Елдәй етеҙ ҡыйыу ҡыҙға башым эйәм, тик ят елдәр теймәһен, тип, янам-көйәм.* М. Басыров. *Ант иттем һис кемде һөймәҫкә, һаҡландым мин яныу-көйөүҙән.* М. Ғафури.

**ЯНЫУЫС** *и.* Салғы яный торған ҡорал. *Ҡайраҡ яныуыс. Ҡом яныуыс. Тимер яныуыс. Таш яныуыс.* ■ *Мөхит .. итек ҡуңысынан яныуыс*

*алып, бик йәтеш итеп салғыһын яный башланы.* Ә. Вәли.

**ЯН-ЯҠ** *и.* Яҡын тирәләге, әйләнәләге ер; тирә-яҡ. *Ян-яҡҡа ҡарау. Ян-яҡҡа таралыу.* ■ *«Был өй ҡайҙа булған да, бисәм һәм балаларым ҡайҙа китте икән?» тип [Дәүләтбай] ян-яғына ҡараны.* И. Көҫәпҡол.

**ЯҢАҠ** *и.* **1.** Биттең ике сикәнән түбәнге тештәр урынлашҡан өлөшө; яҡ. *Яңаҡҡа таяныу.* ■ *Нәгим ас яңаҡтарын тағы ла эскәрәк һурып, кепка аҫтынан ғына ҡарап ултыра.* Һ. Дәүләтшина. **Яңаҡ һөйәге** ике яҡлап теш урынлашҡан бит һөйәге.

**2.** Ишек, тәҙрә уйымының ян ағасы; яҡ. *Ишек яңағы. Тәҙрә яңағы.* ■ *Тәҙрәләрҙең яңаҡтары, ҡашағалары, төптәре майлы аҡ буяу менән буялған.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Ҡорал-ҡорамалдың ике яҡ ҡабырға өлөшө. *Балтаның яңағы. Ҡапҡаның яңағы.*

◆ **Ишек яңағы яткырмау** туктауһыҙ инеп-сығып йөрөү. **Тел менән яңаҡҡа һалышыу** хәбәрҙе, һүҙҙе күпкә һуҙыу, күп һөйләү. **Шар яңаҡ** күп һөйләгән кеше. **Яңағың ҡороғор** күп һөйләгән кешене әрләгәндә әйтелә.

● *Яманға ялынһаң, яңағың һыныр.* Мәҡәл.

**ЯҢАҠЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **яңаҡлау.**

**ЯҢАҠЛАУ** *к.* Уңлы-һуллы яңаҡҡа һуғыу; сикәләү. *Байдалы ниндәйҙер бәләкәс кенә ҡара һөрөнкө йөҙлө ҡыҙҙы яңаҡлап: — кит бынан .. тип ҡыскырып ебәрҙе.* Н. Иҙелбай.

**ЯҢАҠЛАШЫУ** *к. урт. ҡар.* **яңаҡлау.**

**ЯҢҒЫҘ** *с.* **1.** Башҡаларҙан айырым, үҙенә бер башҡа. *Яңғыҙ ҡайын. Яңғыҙ өй.* ■ *Ялан уртаһында яңғыҙ кәбәнгә оҡшаған йоморо ғына тауҙы иҫкә алмағанда күл тирәһендә .. бер ҡалҡыулыҡ та юҡ.* М. Вәлиев.

**2.** Дуҫ-иш, туған-тумасаһыҙ, бер бөртөк. *Яңғыҙ бала. // Яңғыҙ йәшәү. Яңғыҙ эшләү.* ■ *Яңғыҙ ғына башым юҡ юлдашым, сит илдәрҙә йөрөйөм ирекһеҙ* (Халыҡ йырынан).

● *Ҡалын, йыуан булһа ла, яңғыҙ ағас өй булмаҫ.* Әйтем. *Яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәй.* Әйтем. *Яңғыҙ бала яуҙа ҡаты.* Мәҡәл. *Юлда яңғыҙ булһаң, юл оҙон; өйҙә яңғыҙ булһаң, көн оҙон.* Мәҡәл.

**ЯҢҒЫҘАҠ** *и.* **1.** Ғаиләһеҙ, яңғыҙ кеше. *Яңғыҙаҡтар ятағы.* ■ *Бик һәйбәт итеп һалынған малсылар өйө бар. Яңғыҙаҡтар шунда тора. Ә башлы-күҙлеләргә колхоз шәхси өй һалырға ярҙам иткән.* Н. Мусин.

**2.** *тар.* Күмәк хужалыҡҡа ҡушылмай, үҙ алдына хужалыҡ иткән крәҫтиән. // *Яңғыҙаҡ хужалыҡ.* ■ *Колхозға һикһән биш хужалыҡ берләште, яңғыҙаҡтар ун ике йорт.* М. Тажи.

**ЯҢҒЫҘЛАНЫУ** *к.* Яңғыҙға ҡалыу.

**ЯҢҒЫҘЛАТЫУ** *к.* Яңғыҙ тип ситләтеү. *[Һәүбән — ҡыҙға:] Яу аҫһа ла атайың, тайшанмаҫҡа уйым бар. Яңғыҙлатмаҫ үҙемде Урал тигән илем бар.* «Аҡбуҙат».

**ЯҢҒЫҘЛАУ** *к.* Яңғыҙ итеү. *Юл буйы тулы — парлап та, яңғыҙлап та еккән арбалар, ырандастар.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Яңғыҙға ҡалдырыу, яңғыҙ итеп айырыу. *Боланы сығарғанда яңғыҙлап, түбәләп ташламаһындар, һаҡ булырға кәрәк.* Т. Хәйбуллин.

**ЯҢҒЫҘЛЫҠ** *и.* Яҡын кешеһеҙ, яңғыҙ булған хәл. *Яңғыҙлыҡтан интегеү. Яңғыҙлыҡҡа өйрәнеү.* ■ *Йәш кешенең яңғыҙлыҡтан күңелһеҙләнеп, эсе бошоп киткән сағы ла булыр.* М. Тажи.

● *Яңғыҙлыҡ йән картайта.* Әйтем.

**ЯҢҒЫҘҺЫНЫУ** *к.* Үҙеңде яңғыҙ итеп тойоу. *Хаят шул иҫтәлектәр менән ауылда яңғыҙһынып йөрөй.* Һ. Дәүләтшина.

**ЯҢҒЫҘҺЫРАТЫУ** *к. эйһ. ф. ҡар.* **яңғыҙһырау.** *Балалар ситтә булғас, яңғыҙһырата.*

**ЯҢҒЫҘҺЫРАУ** *к.* Үҙеңде яңғыҙ итеп тойоу. *Ошо айырылышыуҙан һуң Харис үҙенә ниҙер етмәүен, яңғыҙһырап йөрөй башлауын һиҙҙе.* Н. Мусин.

**ЯҢҒЫҘҺЫТЫУ** *к.* Яңғыҙ итеп ҡыйырһытыу, ситләтеү, айырып ҡарау. *Беҙ олатайымды мөмкин тиклем яңғыҙһытмаҫҡа тырыштыҡ.. Мин уның эргәһенә элеккегә ҡарағанда ла йышыраҡ йөрөй башланым.* З. Хисмәтуллин.

**ЯҢҒЫҘ-ЯЛПЫ** *и. йыйн.* Ярҙамсыһыҙ, терәкһеҙ яңғыҙлыҡта ҡыйырһытылған кешеләр.

**ЯҢҒЫҘ-ЯРЫ** *с.* Бөтөнләйгә бер үҙе; япа-яңғыҙ. *Яңғыҙ-яры кеше. // Яңғыҙ-яры йәшәү.* ■ *Ул саҡта Оло Уралтау кейек-ҡырағай йыртҡыстарға иҫәпһеҙ бай, яңғыҙ-яры йөрөүселәргә ҡурҡыныс була.* «Ҡуңыр боға».

**ЯҢҒЫҘ-ЯРЫМ** *с. ҡар.* **яңғыҙ-яры.**

**ЯҢҒЫРАТЫУ** *к.* Көслө, асыҡ итеп сығарыу (тауышҡа ҡарата). *Яңғыратып йырлау. Урман яңғыратып ҡыскырыу.* ■ *Йырла, егет, киреп киң күкрәгең яңғыратып Уралдың буйҙарын* (Халыҡ йырынан).

**ЯҢҒЫРАУ** *к.* **1.** Көслө, асыҡ булып сағылыу (тауышҡа ҡарата); сыңғырау. *Яңғыраған тауыш.* ■ *Унға боролғас та, эргәлә генә мылтыҡ тауышы яңғыраны.* Я. Хамматов. *Ал таң менән Ватан эшкә ҡалҡа, йыр яңғырай тауҙар артынан.* Ғ. Әмири. / Төрлө тауыштар сығып шаулап тороу. *Дуғала көмөш тауышлы ҡыңғырауҙар деңгел-деңгел — туғай яңғырай.* Б. Бикбай. *Пароходтар Иҙел буйлап бара, бөҙрә тулҡындарҙа тирбәлеп, яңғырап ҡала йәшел урманлыҡтар, болон һәм дә ярҙар тирәһе.* Ғ. Сәләм.

**2.** *күсм.* Күп ерҙәргә таралыу, билдәле булыу. *Исеме донъяға яңғырай.* ■ *Шиғыры гимн булып яңғыраһын, шиғыры дәүер менән тын алһын.* М. Хәй.

**ЯҢҒЫРАУЫҠЛЫ** *с.* **1.** Көслө, асыҡ яңғыраған. *Ғәтиәтулла олатай .. малайҙарға хас нәҙек, яңғырауыҡлы тауыш менән .. йырлап ебәрҙе.* З. Биишева.

**2.** *күсм.* Йөкмәткегә түгел, тышҡы тәьҫиргә ҡоролған. *Яңғырауыҡлы һүҙ. Яңғырауыҡлы исем. Яңғырауыҡлы булыу.*

**ЯҢҒЫРАШ** *и.* **1.** Яңғырау, ишетелеү рәүеше. *Емештең элек-электән һүҙҙәргә, уларҙың яңғырашына, әйтелешенә артыҡ иғтибар итә торған гәҙәте бар.* З. Биишева.

**2.** *күсм.* Мәғәнә, йөкмәтке үҙенсәлеге. *[Тәржемәсе] поэманы ярты лаш ҡыҫҡартҡан .. һорауһыҙ ҡыҫҡартыу һөҙөмтәһендә поэма тоҡос килеп сыҡҡан, оригиналдағы шикелле үҙ яңғырашын таба алмаған.* Р. Ниғмәти.

**ЯҢҠЫРЫҠ** *и. диал.* Үрәсә.

**ЯҢЫ** I *с.* **1.** Әле эшләнеп, бер ҙә тотонолмаған йәки әҙ тотонолған. *Яңы кейем.* ■ *Һалдаттар иҫке ботинкаларҙы ырғытып, яңы матур итектәрҙе кейәләр.* Д. Юлтый. *Яңы машина нишләтһәң дә яңы инде ул,.. яңыны төҙәтеп тораһы юк.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** Әле эшләнгән, әле булдырылған; һуңғы. *Яңы асыш. Яңы дарыу. Яңы йыр. Яңы тоҡом мал. Яңы фильм. Яңы юл.* ■ *Тик ҡурай һыҙғырған сахра буйлап күтәрелгән яңы ҡалалар.* Ғ. Сәләм. / Әле барлыҡҡа килгән; һуңғы. *Яңы адрес. Яңы ваҡиға. Яңы дуҫ. Яңы тойғо. Яңы фекер. Яңы ысул. Яңы эш.* ■ *[Сәғиҙә:] Мин бит һеҙҙең ауылда яңы кеше, өйрәнеп тә бөтмәгәнмен.* М. Тажи. *Беҙ иҫән-һау, башҡаса юҡ яңы хәбәр.* Ш. Бабич. / Әле генә мәғлүм булған. *Яңы асыштар. Яңы алтын ятҡылығы. Яңы планета. Яңы ысул менән дауалау.* / Быйылғы, ошо йылда өлгөргән. *Яңы бойҙай. Яңы картуф. Яңы ҡыяр.*

**3.** Яҡын осорҙағы; һуңғы. *Яңы заман. Яңы быуын. Яңы тарих. Яңы әҙәбиәт.* / Яҡын осорға, һуңғы ваҡытҡа хас. *Яңы тормош.* ■ *Зыя менән Сәғиҙәнең балаға яңыраҡ исем ҡушабыҙ тип, әллә ниндәй .. исем һайлауҙарына [әбей] ризалығын бирмәне.* М. Тажи.

**4.** Элеккеһенән һуң ҡабатланып килгән, ҡабат булған. *Яңы ай. Яңы көн. Яңы уҡыу йылы. Яңы һөжүм.* ■ *Ныязғол яңы һайлауға тиклем Мораташа менән бер һелкешеп алырға .. мөнтөк әҙләп йөрөй ине.* Һ. Дәүләтшина. / Элеккеһен алмаштырған. *Яңы врач. Яңы директор. Яңы уҡытыусы. Яңы хөкүмәт. Яңы календарь.*

II *р.* Әле генә, күптән түгел. *[Сынбулатов:] Бына ауылға яңы ғына килгән мөғәллимәгә һөнәрегеҙҙе күрһәтегеҙ.* М. Тажи. *Күлуртлар яңы ултыртҡан ағастарға ямғыр яуҙырып сыҡҡан* (Әкиәттән).

♦ **Яңы ай** иҫке ай түңәрәкләнеп тулғандан һуң икенсе ай башында ураҡ һымаҡ булып ҡалҡҡан ҡыйғас ай. **Яңы йыл** беренсе ғинуар көнө (яңы тыуған айҙың беренсе көнө). **Яңы йыл менән!** Яңы тыуған йыл менән ҡотлау һүҙе. **Яңы телдәр** боронғо үле телдәрҙән айырмалы рәүештә хәҙерге телдәр. **Яңы стиль** (календарь) 1582 йылда Юлиан календары урынына Григорий III тарафынан индерелгән һәм григориан тип йөрөтөлгән 13 көнгә һуңлап килә торған йыл иҫәбе атамаһы. **Яңы экономик политика** *ҡар.* **политика.**

● *Иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ.* Әйтем. *Яңыны яңы иткән иҫке.* Мәҡәл.

**ЯҢЫБАШТАН** *р. диал.* Өр-яңынан. *Яңыбаштан төҙөү.*

**ЯҢЫЛАР** *и.* Ырғыҙ буйында йәшәгән үҫәргән ырыуы башҡорттарының атамаһы. *Диңгеҙбай, Хәсән, Ташбулат — яңылар* (Хикәйәттән).

**ЯҢЫЛЫҠ** *и.* **1.** Элек билдәле булмаған яңы нәмә. *Фән яңылыҡтары. Яңылыҡ индереү. Яңылыҡ асыу.* ■ *Һәр бер яңылыҡ ҡул сабып ҡаршы алынырға тейеш.* С. Агиш. *Бәлки, улым, һиңә билдәһеҙҙер, яңылыҡтар байтаҡ бар беҙҙә.* Ғ. Амантай.

**2.** Күптән түгел алынған яңы хәбәр. *Һуңғы яңылыҡтар. Яңылыҡ ишетеү. Яңылыҡ һөйләү.*

**ЯҢЫЛЫУ** *ҡ. диал.* Яңылышыу.

**ЯҢЫЛЫШ** *с.* **1.** Дөрөҫкә, ысынға тура килмәгән, дөрөҫ түгел. *Яңылыш һүҙ. Яңылыш фекер. Яңылыш тәржемә. Яңылыш яуап. Яңылыш һығымта. Яңылыш булыу. Яңылыш уйлау. Яңылыш әйтеү. Яңылыш яҙыу. // Һүҙҙең яңылышы. Яңылышын табыу.* ■ *Бөтәһе лә, ярман менән һуғыш сыҡҡан, тигән хәбәрҙең .. яңылыш икәнлеген ишеткеһе килеп, һөйләшмәҫкә, шауламаҫҡа тырышып көттө.* Һ. Дәүләтшина. *Бәғзеләр, бәлки, табыр был китаптың яңылышын.* Ш. Бабич.

**2.** Йүнәлеше дөрөҫ булмаған; хата. *Яңылыш юл. // Яңылыш китеү. Яңылыш йөрөү.* ■ *[Сәғиҙә:] Инәй, килгән саҡта беҙ был шишмәне үтмәгәйнек бит, яңылыш яҡҡа китеп бармайбыҙмы икән?* М. Тажи.

**3.** Тейешле тәртиптән, ҡағиҙәнән ситләшкән; хата. *Яңылыш юлға баҫыу.* ■ *Әгәр бер яңылыш эш эшләһәм, полевой судка бирерҙәр, атырҙар,.. тигән береһенән-береһе ҡурҡыныс уйҙар башҡа килә.* Д. Юлтый.

**4.** *р. мәғ.* Аңғармаҫтан, абайһыҙҙан. *Яҙғы ташҡында бер мулла яңылыш һыуға төшкән дә,.. ағып китеп бара, ти.* Ғ. Амантай. *Уйнағанда Ҡуҙыйкүрпәстең ҡулы яңылыш бер әбейҙең берҙән-бер балаһына тейеп китте, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**ЯҢЫЛЫШЛЫҠ** *и.* Яңылыш булған эш-ҡылыҡ; хаталыҡ. *Яңылышлыҡ эшләү.* ■ *[Мәскәй:] «Яңылышлыҡ менән булды, башым әйләнеп киткән»,— тип хәйлә ҡороп маташа* (Әкиәттән).

**ЯҢЫЛЫШТЫРЫУ** *ҡ.* Яңылыш юлға төшөрөү; хаталандырыу.

**ЯҢЫЛЫШЫУ** *ҡ.* **1.** Яңылышлыҡ ебәреү; хаталаныу. *Күҙ яңылыша. Фекер яңылыша. Яңылышын уҡыу.* ■ *Башта дөрөҫ атлап сыҡҡайныҡ, ҡыҙҙар тапҡырынан үткәндә беҙҙең аяҡтар яңылышты.* Д. Юлтый. *Мәсеттә көрьән уҡыған саҡта яңылышһаң, бөтә мәсет .. әйләнгән кеүек була торғайны.* Т. Йәнәби.

**2.** Тейешле тарафтан, йүнәлештән тайпылыу. *Яңылышып сығып китеү. Юлдан яңылышыу. Яңылышып йөрөү.*

**3.** Тейешле тәртиптән, ҡағиҙәнән тайпылыу; хаталаныу. *Яңылышып китеү.*

● *Ир яңылышып ҡулға төшөр, ҡош яңылышып турға төшөр.* Әйтем.

**ЯҢЫНАН** *р.* Тағы бер тапҡыр; ҡабаттан. *Яңынан башлау. Яңынан күсереү. Яңынан уҡып сығыу. Яңынан эшләтеү.* ■ *Мин диванда ятам, әкиәтсебеҙ төрөпкәһен яңынан тултыра.* Ғ. Сәләм.

**ЯҢЫНАН-ЯҢЫ** *с.* Береһенән береһе яңы, яңы өҫтөнә яңы. *Яңынан-яңы хәбәр. Яңынан-яңы кейем. Яңынан-яңы ерҙәр күреү.* ■ *Яңынан-яңы ҡыҙҙар, егеттәр килә торалар.* Т. Йәнәби.

**ЯҢЫРАҠ** *р.* Күптән түгел, яҡын арала. *Яңыраҡ булған хәл. Яңыраҡ ҡайтҡан кеше.* ■ *Яңыраҡ үләне сабылған яландарҙа шашып ҡурпы үҫте.* Я. Хамматов.

**ЯҢЫРТЫЛЫУ** *ҡ. төш. ҡар.* **яңыртыу.** *Яңы бешкән ҡымыҙ тә, хатта яңыртылған сәй ҙә тәмлерәк була.* К. Мәргән.

**ЯҢЫРТЫУ** *к.* **1.** Яңыға әйләндереү; яңы итеү. *Өйҙө яңыртыу. Кейемде яңыртыу. Исемде яңыртыу.* ■ *Мәрзиә уны йәшлегенең иң кәҙерле, иң саф минуттары менән осраштырҙы, йырланған йырҙарын яңыртты.* Т. Килмөхәмәтов. *Иҫән булһаҡ бер ҡайтырбыҙ иҫке юлҡайҙарҙы яңыртып* (Халыҡ йырынан).

**2.** Нимәлер бөтөп барғанда йәки бөткәндә өҫтәп тултырып, яңынан әҙерләү; яңы итеү. *Көрәгәне яңыртыу. Самауырҙы яңыртыу.* ■ *[Байбисә:] Ҡымыҙҙы яҡшылап, берәр һауын һөт һалып, яңыртырға кәрәк.* Т. Хәйбуллин.

**ЯҢЫРЫҠ** *и.* Өҫтөнә урҙа, кәштә кеүек нәмәнең башын һалыу өсөн стенаға арҡыры ҡаҡҡан ағас.

**ЯҢЫРЫУ** *к.* **1.** Ҡабаттан яңыға әйләнеү, яңы булыу. *Минән башҡа күпме үләндәр бар, улар ҙа бит үлеп терелә. Яңырғанға шулай мәңге улар ҡояш нурҙарына үрелә.* Р. Ғарипов. *Барлыҡ тирә-яҡ үҙгәреп, яңырып китте: аяҡ аҫтына йәп-йәшел үлән түшәлде, ағастар яңы япраҡ ярҙы.* «Урал батыр».

**2.** Яңы менән алмашыныу, яңыға әйләнеү. *Ауылдағы йорттар яңыра.*

♦ **Яңырыу дәүере** Европа илдәренең урта быуаттарҙан һуңғы фән һәм сәнғәт үҫеше менән билдәләнгән яңы осоро.

● *Байҙың ҡатыны үлһә, түшәге яңырыр.* Әйтем. *Илле йылда ил яңырыр.* Әйтем.

**ЯҢЫРЫШ** *и.* Яңырыу күренеше. *Автор хәҙергә колхоз ауылдарында барған яңырыштарҙы күрһәтә.* Ғ. Хөсәйенов.

**ЯҢЫСА** *р.* **1.** Хәҙерге заманса; хәҙергесә, заманға тура килтереп. *Яңыса йәшәү.* ■ *[Халыҡтың] бөтәһендә лә бынамын тигән ҡалай түбәле яңыса һалынған йорт.* К. Мәргән.

**2.** Берәр яңылыҡҡа нигеҙләнеп, яңы алым, ысул менән. *Яңыса эшләү. Эште яңыса ойоштороу.* ■ *Ҡайҙа булһа ла ситкә китеп, яңыса уҡығы килде.* Т. Йәнәби.

**ЯҢЫ-ЮРЫ** *р.* Әле яңы, яңы ғына. *Яңы-юры тыуып килгән хәҙерге әҙәби процестың ҡайһы бер моменттары хаҡында киҫеп кенә әйтеүе лә ҡыйын.* Ғ. Хөсәйенов.

**ЯП-** *киҫ.* «Я» өнө менән башланған төп сифаттарға йәки рәүешкә ҡушылып, артыҡлыҡ дәрәжәһен бирә. *Яп-яҡты. Яп-яҡын. Яп-ялангас. Яп-ялтыр.*

**ЯПАЙ** *с. кар.* **япан.**

**ЯПАҠ** *с. диал.* Лапаҡ. *Япаҡ башлы өй.*

**ЯПАЛДАШ** *с.* **1.** Ҡыҫҡа аяҡлы, үҙе йыуантыҡ (малға ҡарата); тәбәнәк. *Япалдаш бейә һөтлө була.*

**2.** Киң, тәпәшәк, йәйенке ботаҡлы (ағасҡа ҡарата). *Эре ҡайынлыҡ, һирәк-һаяҡ япалдаш ҡарағай, уҫаҡ ағастары аралаш үҫкән урманды үткәс, Таңдыса был урмандың боронғо кәберлек икәнен аңлай.* «Ҡуңыр боға».

**ЯПАН** *с.* **1.** Кеше аяғы баҫмаған, йән эйәһе булмаған (ҡырағай ергә ҡарата). *Япан дала. Япан булыу. // Япанда йөрөү. Япанға сығыу.* ■ *Ҡайтһын, ҡайтһын илгә, ҡырағайланып, яңғыҙ йөрөмәһен япанда.* М. Тажи.

**2.** Яңғыҙ. *Япан ағас.*

**ЯПАНАН-ЯҢҒЫҘ** *р. диал.* Япа-яңғыҙ.

**ЯПАНЛЫҠ** *и.* Ҡырағай, аулаҡ ер. *Мин йөрөнөм гиҙәй япанлыҡта, яҙмышымдан көйөнөп, үкһенеп.* М. Тажи.

**ЯПАР: япар бырау** *диал.* кендек бырауы (*кар.* **кендек** [2]).

**ЯПА-ЯҢҒЫҘ** *с.* Бөтөнләй яңғыҙ. *Япа-яңғыҙ кеше. Япа-яңғыҙ өй. // Япа-яңғыҙ ҡалыу. Япа-яңғыҙ тороу. Япа-яңғыҙ йәшәү.* ■ *Япа-яңғыҙ ғына ҡарсығаға талпыналыр, бахыр, ҡош күреп* (Халыҡ йырынан).

**ЯПҠАҠ** *и. диал.* **1.** Ҡапҡас. *Япҡаҡ ябыу.*

**2.** Аҫҡы үрәсә.

**ЯПҠЫС** *и. диал.* **1.** Ҡапҡас, япма.

**2.** *кар.* **итәк** 3.

**ЯПМА** *и.* **1.** Ниҙе лә булһа өҫтән ябып ҡуйыу өсөн тегелгән махсус сепрәк; ябыу. *Аҡ япма. Сигеүле япма. Ат япмаһы. Япма йәйеү.* ■ *Ҙур өҫтәл .. өҫтө яңы зәңгәр япма менән ябылған.* С. Агиш.

**2.** Түшәк өҫтөнә йәйеп ята торған оҙон киң туҡыма; түшәк ябыуы. *Икенсе көндө иртә менән ап-аҡ япмалы йомшаҡ карауатта күҙҙәрен асып ебәргәс, Ғабдулла үҙ квартираһын үҙе таныманы.* Д. Исламов.

**3.** Өҫтө лапаҡ итеп ябылған асыҡ кәртә; лапаҫ. *Беҙ арбаны япма аҫтына ҡуйҙыҡ.* К. Кинйәбулатова. *Турғайҙар һалҡын һауанан ҡушеғеп, япма аҫтарына йәшеренгән.* Н. Ҡәрип.

**ЯПМАЛАУ** *к.* Япма менән ябыу.

**ЯПМЫС** *и. диал. кар.* **итәк** 3.

**ЯПОН** *и.* Японияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләттең бер кешеһе (палеоазиат телдәренең береһендә һөйләшә). *Япон теле. Япон халҡы. Япон кешеһе. Япон ҡыҙы.*

**ЯПОНСА** *р.* **1.** Япон телендә. *Японса уҡыу. Японса һөйләшеү.*

**2.** Япондарға хас рәүештә. *Японса кейенеү. Японса бейеү.*

**ЯПРАЙ** *с.* Киң, яҫы булып торған. *Атайым менән ҡатарҙан аяҡ салып-тырып ҡарсыға моронло, япрай ҡашлы .. бер ҡарт ултыра ине.* Һ. Дәүләтшина.

**ЯПРАЙТЫУ** *к.* Киң, яҫы итеп тырпайтыу. *Ҡолаҡты япрайтыу.*

**ЯПРАЙЫУ** *к.* Киң, яҫы булып йәйелеп тороу. *Япрайған ҡаш.* ■ *Закир баш осонда япрайып үҫкән дегәнәк япрағы менән битен ҡаплап, салҡан әйләнеп ятты.* З. Биишева. *Томбойоҡтар япрайып, күлде биҙәп, сәскә атҡан.* «Урал батыр».

**ЯПРАҠ** [1] *и.* Үҫемлектең ҡояш нуры ярҙамында углекислота һәм һыуҙы шәкәр матдәһенә әйләндереп туҡланыу өсөн хеҙмәт иткән төрлө формалағы йәшел йоҡа өлөшө. *Ағас япрағы. Үлән япрағы. Йәшел япраҡ. Һары япраҡ. Япраҡ сығыу. Япраҡ ярыу. Япраҡ ҡойолоу.* ■ *Муйыл, сирень еҫтәре аңҡып торған, ҡайын, йүкәләр шаулап япраҡ ярған .. иң күркәм бер миҙгел ине.* М. Тажи.

♦ **Баҡа япрағы** ваҡ ҡына һары сәскәле, ҡалын йылтыр түңәрәк япраҡлы һаҙ үләне. **Ҡолаҡ япрағы** *кар.* **ҡолаҡ** 2. **Тәлмәрйен япрағы** *кар.* **баҡа япрағы. Япраҡ еле** ағас япраҡ ярыр алдан була торған яҙғы һыуыҡ ел. *Яҙ килә, матур ай килә, япраҡ елдәре өрөп.* А. Игебаев. **Юл япрағы**

*кар.* **яр япрағы. Яр** (*йәки* **яра**) **япрағы** ергә түшәлеп үҫкән киң япраҡлы, нәҙек яланғас һабаҡлы, башаҡ башлы үлән (ғәҙәттә яраға ябалар). *Гөлйөҙөм Хисмәтулланың ҡамсы менән телгеләнгән арҡаһына яра япраҡтары йәбештерҙе.* Я. Хамматов.

**ЯПРАҠ** [2] *и.* Мунсала сабыныу өсөн һепертке һымаҡ итеп бәйләгән йәшел япраҡлы ҡайын ботаҡтары; миндек. *Япраҡ бәйләү. Япраҡ менән сабыныу.*

**ЯПРАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Япраҡ сығарыу, япраҡ ярыу. *Ағасты ултыртыу ғына етмәй, ул үҫһен, япраҡланһын, емеш бирһен өсөн тәрбиәләргә .. кәрәк.* М. Тажи.

**ЯПРАҠЛАП** *р.* Япраҡ һымаҡ итеп. *Эткол бай .. алдына ҡуйған һөйәк итен япраҡлап турай.* Т. Хәйбуллин.

**ЯПРАҠЛЫ** *с.* **1.** Япрағы булған. *Япраҡлы ботаҡ.*

**2.** Япраҡ яра торған. *Ҡыяҡ япраҡлы үлән. Туңәрәк япраҡлы ағас.* **Япраҡлы урман** япраҡ яра торған ағаслы урман. *Япраҡлы урмандар ҡайын, уҫаҡ, йүкә, имән, йыла, ҡарама һәм саған ағастарынан тора.* М. Хисмәтов.

**ЯПРЫЙ** *с. диал.* Япрай. *Япрый ҡолаҡ. Япрый булыу.*

**ЯПРЫҠ** *и. диал.* Айғолаҡ.

**ЯПРЫШ** *с. диал.* Япрай. *Япрыш ҡарағай. Япрыш булыу.*

**ЯПСАУЫРЛАУ** *ҡ. диал.* Ҡурсалау.

**ЯПТЫҠ** *и. иҫк.* Әҙерлек хәстәре.

● *Ҡыш яптығын күрмәгән ҡысыныр ҙа тырнаныр.* Әйтем.

**ЯПТЫРЫУ** *ҡ. йөкм. кар.* **ябыу** [1]. *Өй башын яптырыу. Түбә яптырыу.*

**ЯПҺАРЫУ** *ҡ.* **1.** Берәй сәбәпте, ғәйепте кемгә йәки нимәгәлер ауҙарыу; һылтау. *Кешегә япһарыу.* ■ *[Ҡунаҡкол:] Мин һине күргәнем дә, белгәнем дә юҡ. Ғәйебеңде ғүмер буйы кешегә япһарҙың.* Х. Ғиләжев. *[Саҙрый:] һин .. үҙең шулай хата яҙып ебәргәнһеңдер. Миңә япһарма.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Кемделер, нимәнелер яҡлау, ҡурсалау. *Йән әсеүле йәшәп хәтһеҙ ирҙәр, япһара алмай олпат ерҙәрен көн күргәндәр.* С. Кулибай.

**ЯР** [1] *и.* Һыуға килеп терәлгән ҡоро ер ситe. *Диңгеҙ яры. Йылға яры. Текә яр. Яр аҫты. Яр башы. Яр буйы.* ■ *Иҙел ярҙарынан һырттар киткән, сағыл таштар ята тауында.* Ғ. Сәләм. *Ярһып ташҡан яҙғы ташҡын һыуҙар туҡһын-туҡһын ярҙы ҡағалар.* Ғ. Амантай.

◆ **Ярҙай** *йәки* **яр кеүек** ҙур, эре булған нәмәләргә әйтелә. *Ярҙай һыйыр. Ярҙай булыу.* ■ *Ҡатындар .. тарының уңғанлығына хайран ҡалып ҡарап торҙо: «Ярҙай булып үҫкән, ҡуйсы ла».* Ж. Кейекбаев.

**ЯР** [2] *и.* Күмәк халыҡҡа ҡысҡырып белдергән иғлан, оран. ■ *Арыҫлан тик ятманы, сығарҙы яр: «Килһендәр бында,— тине,— барса януар».* М. Ғафури. *[Көнәфейә] ике ярсыны саҡырып алды ла бейҙең әмерен йәүкәләү өсөн урам һайын яр ҡысҡырырға ҡушты.* «Бикйән мәргән».

□ **Яр итеү** иғлан итеү; белдереү. *Герман Рәсәйгә һуғыш башлаған .. Хөкүмәт тарафынан дөйөм мобилизация яр ителгән.* Ж. Кейекбаев.

◆ **Яр ҡабаҡлы** тумтайып һалынып төшөп торған. *[Офицер] ҡырлас көмөрө танаулы, яр ҡабаҡлы, уҫал, үткер ҡарашлы..* И. Көҫәпҡол. **Яр һалыу** ныҡ ҡысҡырыу, ныҡ тауышланыу. *Яр һалып илау. Яр һалып ҡысҡырыу.* ■ *Макарканы күреп мин яр һалдым: — Макарка!.. Ошо азатлыҡ килеүме инде?!* Б. Бикбай.

**ЯР** [3] *и. кар.* **йәр.** *Һөйгән яр. Яр булыу. Яр һөйөү.* ■ *Егет малһыҙ, малһыҙ ҙа тип хурламағыҙ, малһыҙ, ярһыҙ йөрөмәй тәҡдирһеҙ* (Халыҡ йырынан).

**ЯРА** *и.* **1.** Тәндәге йәки эске бер ағзалағы ҡырҡылып, тишелеп һ. б. зыянлаған урын; йәрәхәт. *Асыҡ яра. Ауыр яра. Мылтыҡ яраһы. Тән яраһы. Яра боҙолоу. Яраны бәйләү.* ■ *Аттың уң аяғы түбығынан түбән ҡамсы кеүек һалынып төшкән, асыҡ яраһынан соролдап ҡан ағып тора.* Б. Бикбай. *Сәмрегош телен сығарып Айыуғолаҡтың киҫелгән ерен бер генә ялағайны, яраһы уңалды ла ҡуйҙы, ти* (Әкиәттән). **Бөтәү яра** тыштан күренмәгән, эстән боҙолған яра. / *күсм.* *һөйл.* Нимәнеңдер зыян күреүҙән булған боҙоҡ урыны, йәрәхәте. *Саҙрый .. үҫеп ултырған ағастың яраһын цемент менән һылап ҡуйыуҙы беренсе тапҡыр күрә.* А. Абдуллин.

**2.** *күсм.* Ауыр кисереш, рухи ғазап. *Мөхәббәттән булған яралар ҙа, һуғыштарҙан ҡалған яралар ҙа бер уҡ улар, беҙҙең йөрәктәргә бер уҡ ут һәм әрнеү һалалар.* Н. Нәжми. **Тел яраһы** ауыр, ҡаты һүҙ ишетеүҙән кисерелгән рухи ғазап.

◆ **Яраға тоҙ һалыу** *кар.* **тоҙ. Яра япрағы** *кар.* **япраҡ** [1]. **Яра ташы** *кар.* **таш.**

● *Ҡул яраһы китәр, тел яраһы китмәҫ.* Әйтем. *Уҡ яраһы беләктә, тел яраһы йөрәктә.* Әйтем.

**ЯРАББИ** [*ғәр.*] *ымл. дини* «Йә аллам» тигән мәғәнәлә аллаға мөрәжәғәт итеү һүҙе булып, ялбарыу, ғәжәпләнеү, нәфрәтләнеүҙе белдерә. *Ярабби был баланы. Ярабби хоҙайым!..* ■ *Ярабби, килен кем .. Бәҙеголдоң ҡыҙ сағы бит был!* М. Кәримов.— *Ярабби хоҙайым, ысынмы? — Ысын инәй, батшаның тәхетен ҡолатҡандар!* һ. Дәүләтшина.

**ЯРАББЫМ** *ымл. кар.* **ярабби.**

**ЯРАЙ** *киҫ.* **1.** Ни менәндер килешкәнде, риза булғанды белдерә; ярар. *«Ярай, һеҙҙеңсә булһын»,— тип килешә Юламан ҡарт.* З. Биишева. *«Ярай, барырмын»,— тинем, вәғәҙә бирҙем.* Д. Юлтый.

**2.** *мөн.* Ниҙелер бер төрлө итеп уйлағанда, фараз иткәндә әйтелә. *[Ғамир:] Ярай, бер ат юғалды, ти, уға бит әле .. мин ғәйепле түгел дә баһа.* Б. Бикбай.

◆ **Ярай ҙа** берәр эш-хәлгә икеләнгәндә, килешмәгәндә әйтелә.— *Ярай ҙа эш ошоноң менән генә бөтһә?* Б. Бикбай. **Ярай инде** теләмәй генә риза булғанда әйтелә. *Күп тартышып тормай: «Ярай инде улай булғас»,— тинем.* Т. Йәнәби. **Ярай әле** ниҙеңдер һөҙөмтәһе менән ҡәнәғәт булғанда, тынысланыу белдергәндә әйтелә.— *Ярай әле Хисам бабайығыҙ ҡайтып әйтте, ул күрмәгән булһа, мин һеҙҙе нисек табыр инем.* М. Тажи.

**ЯРАЙМЫ** *киҫ. кар.* **йәме.**

**ЯРАЙҺЫ** *с.* Ярарлыҡ, арыу.— *Бында мин һинең ҡағыҙҙарың менән танышып сыҡтым.*

*Ярайһы егет күренәһең, кустым.* Б. Бикбай. // *Эш миңә лә ярайһы ғына эләгә: иртәнсәк мал-тыуарҙы көтөүгә ҡыуам, аласыҡҡа утын индерәм, иртәнгелеккә ашап алыу менән икәүләп йүкәгә тотонабыҙ.* Н. Мусин.

**ЯРАҠ** *и.* **1.** Төрлө кәрәк нәмә. *Өй ярағы. Саңғы ярағы. Түшәк ярағы. Яу ярағы.*

**2.** Ниҙелер башҡарыу өсөн күрелгән хәстәр. *Туй ярағы. Юл ярағы.* ■ *Сәфәр ярағын күреп, аҙыҡ, кейем-һалым, һауыт кеүек нәмәләрҙе алып, тоҡтарға тултырҙыҡ.* Ш. Хоҙайбирҙин. *[Шүлгән:] Инде һүҙем алмаһаң, асыҡ яуап бирмәһәң, үҙ ярағым күрәйем, үҙ юлымда булайым.* «Урал батыр».

**ЯРАҠЛАНЫУ** [1] *ҡ.* Кәрәк булған бөтә ҡорал-ҡорамалды, хужалыҡтағы кәрәк-яраҡты булдырыу; ҡолланыу.

**ЯРАҠЛАНЫУ** [2] *ҡ. диал.* Яраҡлашыу. *Кешегә яраҡланыу.*

**ЯРАҠЛАШТЫРЫУ** *ҡ.* Бер төрлө шартҡа, талапҡа ҡулайлы, яраҡлы итеү. *Тормошҡа яраҡлаштырыу. Талапҡа яраҡлаштырыу. Маҡсатҡа яраҡлаштырыу.* ■ *Радио тапшырыуҙарын .. бигерәк тә ауыл халҡының талаптарына яраҡлаштырып төҙөргә кәрәк.* Ә. Моратов.

**ЯРАҠЛАШЫУ** *ҡ.* **1.** Булған төрлө хәлгә йәтешләнеү; яйлашыу, ҡулайлашыу. *Климатҡа яраҡлашыу. Шартҡа яраҡлашыу.* ■ *Әҙәм балаһы, ниндәй генә хәлгә ҡалһа ла, тормошҡа яраҡлаша ала.* «Ағиҙел», 1980, № 2.

**2.** Кеше ыңғайына йәтешләнеү; ярау. *Яраҡлашып йәшәү.*

**ЯРАҠЛЫ** *с.* Нимә өсөндөр ҡулланырлыҡ; ярарлыҡ. *Эшкә яраҡлы. Орлоҡ сәсеүгә яраҡлы.*

**ЯРАҠҺЫҘ** *с.* Ниндәйҙер эшкә, маҡсатҡа, нимә өсөндөр ҡулланыуға ярамаған; ярамаҫлыҡ. *Ашауға яраҡһыҙ. Эсеүгә яраҡһыҙ һыу. Эшкә яраҡһыҙ.* ■ *Ул [Ғәлиәкбәр] клуб мөдире булыуға, халыҡ араһында аң-белем эше алып барыуға яраҡһыҙ.* З. Биишева.

**ЯРАҠҺЫҘЛАНЫУ** *ҡ.* Яраҡһыҙға әйләнеү, яраҡһыҙ булыу. *Хужалар уның [Фәррәхтең] эшкә яраҡһыҙланғанын күргәс, эштән ҡыуалар.* Ғ. Әмири.

**ЯРАЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Яра алыу, яралы булыу. *Ҡаты яраланыу. Һуғышта яраланыу. Яраланып ҡайтыу.* ■ *Командир? .. Ах .. тағы яраланған, маузер ерҙә, патрон сәселгән...* Р. Ниғмәти.

**2.** *күсм.* Ауыр кисереш, рухи ғазапҡа дусар булыу. *Яраланған йөрәк. Яраланған күңел.* ■ *Әллә ҡайҙан эстән илап, һыҡрап, яралана ҡалын күкрәк.* Б. Ишемғол.

**ЯРАЛАУ** *ҡ.* **1.** Яра һалыу, яралы итеү. *Силәбе ҡалаһын дошмандан таҙартҡанда дошман пуляһы Лотфулланы яралай.* И. Ниғмәтуллин. *Ағымды яралаңы Балҡантауҙың ташлығы* (Бәйеттән).

**2.** *күсм.* Рәнйетеү. *Йөрәкте яралау. Күңелде яралау.* ■ *Юламан ҡарт кескәй баланың йөрәген яраламаҫ өсөн унан әсәһе хаҡындағы дөрөҫлөктө йәшергәйне шул.* З. Биишева.

● *Ергә ят ҡулы тейһә — ярылай, ә хужа ҡулы — ярығын ямай.* Әйтем. *Ҡылыс тәнде яралай, яла йәнде яралай.* Әйтем. *Үк тәнде — һүҙ йәнде яралай.* Әйтем.

**ЯРАЛҒЫ** *и.* **1.** Ҡарын йәки йомортҡа эсендә яңы ғына яралған бала; эмбрион. *Малдың ҡарынынан яралғыһы сыҡты.*

**2.** *күсм.* Ниҙеңдер иң тәүге башланғысы. *Киләсәк тормош яралғыһы.*

**3.** *диал. ҡар.* бәбәк [1]. *Башаҡ яралғыһы. Яралғынан үҫеп китеү.*

**ЯРАЛТЫУ** *ҡ.* Барлыҡҡа килтереү, бар итеү. *Шул батырҙар эше менән үҙ бәхетен яралтҡан, бар донъяны таң ҡалдырып ҡалҡынды беҙҙең ватан.* С. Әлибаев.

**ЯРАЛЫ** *с.* Яраһы булған, яраһы бар, яраланған. *Яралы кеше. Яралы һалдат.* ■ *[Булат:] Гөлдәр .. яралы бармағымды һаҡ ҡына таҙартып, урай ҙа башланы.* К. Кинйәбулатова. // *Әгәр һуғыш ҡырҙарында ятып ҡалһа беребеҙ, яралыны ҡотҡарырға утҡа, һыуға индек беҙ.* Н. Иҙелбай.

**ЯРАЛЫУ** *ҡ.* Барлыҡҡа килеү, тыуыу, бар булыу. *Йомортҡанан яралыу. Орлоҡтан яралыу. Яралып үҫеү.* ■ *Бөгөнгө көн мин тыуҙым,.. үҫтем ҙур булдым, ник яралдым, ник тыуҙым?* Ш. Бабич. *Бер ҙә эҙһеҙ китер өсөн генә яралманым мин, был ергә.* С. Әлибаев. *Ырғыҙ буйы — алты ауыл .. алтынан, әйтерһең дә балсыҡ өйҙәр яралғандар ялҡындан.* Р. Ғарипов. / *күсм.* Уй, фекер, төрлө тойғо, йыр һ. б. нәмә барлыҡҡа килеү, тыуыу. *Япраҡ ҡарҙар менән буталғанда күңелемдә бер йыр ярала.* Р. Бикбаев. *«Яратам», тип әйткәс дуҫым ҙур табында күңелемдә шик яралды..* М. Кәрим.

● *Дошман дуҫтан ярала.* Мәҡәл. *Килен кәйнә буҫағаһынан, кейәү ҡайны буҫағаһынан яралыр.* Мәҡәл.

**ЯРАМАЙ** *киҫ.* Нимәнәндер тыйғанды, иҫкәрткәнде белдерә; кирәһе ярай. *Һеҙ тормошто бик әҙ беләһегеҙ... Ярамай, аҡылһыҙ булмағыҙ.* Ғ. Сәләм.

**ЯРАМҺАҠ** *с.* Ярарға тырышып, юхаланып, яҡшатланып йөрөгән. *Ярамһаҡ кеше. Ярамһаҡ булыу.* ■ *Кем бай, кем батша һанаттатары алдында ярамһаҡ, әйткән бер һүҙенә бейеп кенә тора — шул түрәлеккә иң ҡулай кеше.* Б. Бикбай.

● *Дошмандан илең һаҡла, ярамһаҡтан серең һаҡла.* Әйтем.

**ЯРАМҺАҠЛАНЫУ** *ҡ.* Ярарға тырышыу; ҡуштанланыу, яҡшатланыу. *Ярамһаҡланып йөрөү.* ■ *Быңа шул саҡ кемдер Айрастың сабып йөрөгәнен күреп ҡалған да, ярамһаҡланып, Өлкәман байға барып ошаҡлаған.* Ш. Насыров.

**ЯРАМҺАҠЛЫ** *с. ҡар.* **ярамһаҡ.** *Ярамһаҡлы күренеү.* ■ *Артыҡ ярамһаҡлы булыуҙан, өрмәй ултыртмайһың урынға.* С. Кулибай.

**ЯРАН** [1] [*фарс.*] *и.* Халыҡ араһында етәксе, башлыҡ булған кешенең эшендә, көрәшендә һ. б. иң яҡын ярҙамсыһы, иптәше. *Батшаның ярандары. Яран булыу. Яран итеү.* ■ *Комдив .. һәр бер полктың хәрәкәт итеү йүнәлешен билдәләне.— Айбарҙар алға! — тине ул ярандарын изге юлға оҙатып.* Ә. Ихсан. / Ярҙамсы, иптәш. *[Йәмгәле:] Батырмын тип яланда яңғыҙ булма, үҙеңә тиң ярандар эҙлә.* С. Агиш.

**ЯРАН** [2] [*рус.* герань ⟨*гр.*⟩] *и.*, **яран гөлө** Бесәй табаны һымаҡ түңәрәк, еҫле япраҡлы, төрлө төҫтәге өйкөм сәскәле үҫемлек. *Ҡыҙыл яран. Түгәй*

*яраны.* ■ *Ҡына гөл төҫлө була, яран гөл еҫле була* (Халыҡ йырынан).

**ЯРАР** *киҫ. ҡар.* **ярай.** *Ярар инде. Ярар улайһа.* ■ *[Хафиз карт:] Ярар, ҡыҙым, бошонма, үҙем бер әмәлен уйлап ҡарармын әле.* М. Тажи. *Ярар инде, булған эш булған. Таш менән атҡанға аш менән ат тигән боронғолар.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Ярарҙың башы ауыртмай** һәр ҡушҡан йомошҡа, эшкә эшләһә лә эшләмәһә лә риза булып торған кешегә ҡарата мыҫҡыллап әйтелә. *Йомош ҡушһаң ҡарышмаҫ ул, гел генә әйтер «ярар», ярарҙың башы ауыртмай эшкә итһә лә зарар.* А. Игебаев.

**ЯРАРЛЫҠ** *с.* Нимә өсөндөр ҡулланырлыҡ, ниндәйҙер талапҡа яуап биргән; яраҡлы. *Ашарға ярарлыҡ. Өйө торорға ярарлыҡ.* ■ *Ҡәмәр әбей ҡунаҡҡа барғанда кейергә ярарлыҡ кейем-һалымын рәтләп, йыртыҡ урындарын ямап,.. таҫтарҙарын таҙарта.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЯРАТТЫРЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **яратыу** [1].

**ЯРАТЫЛЫУ** [1] *к. төш. ҡар.* **яратыу** [1]. *Яратылып йәшәү.*

**ЯРАТЫЛЫУ** [2] *к. төш. ҡар.* **яратыу** [2]. *Донъя яратылғандан бирле.*

**ЯРАТЫЛЫУ** [3] *к. төш. ҡар.* **яратыу** [3]. *Яратылған аттар.*

**ЯРАТЫРЛЫҠ** *с.* Яратырға ярарлыҡ, яратырға лайыҡ. *Яратырлыҡ кеше. Яратырлыҡ булыу. Яратырлыҡ түгел. // Яратырлығы ҡалмаған. Яратырлығы юҡ.*

**ЯРАТЫУ** [1] *к.* **1.** Кемде йәки ниҙәлер үҙ итеп, ныҡ яҡын күреү. *Баланы яратыу. Кешене яратыу. Тыуған илде яратыу.* ■ *Ҡарттар улдарын бик яратҡан, ул ни теләһә, шуны үтәргә әҙер торған, ти* (Әкиәттән). / Йылы хис белдереп, һөйөү, иркәләтеү, наҙлау. *Сәғиҙә әбей .. Зәһиттың арҡаһынан һөйөп яратты.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Икенсе енестәге кешегә мөхәббәт тойғоһо кисереү; һөйөү. *Яратҡан егет. Яратҡан ҡыҙ. Яратып барыу.* ■ *Аҙнағол сабырһыҙлана, мин Зөлхизәне яратам, унһыҙ йәшәй алмайым, тип ныҡыша.* З. Биишева.

**3.** Нимә менәндер мауығыу, үҙ теләгең менән шөғөлләнеү. *Китап яратыу. Эш яратыу.* ■ *Дивизион командиры Макеров һунарсылыҡты үлеп ярата торған кеше ине.* С. Кулибай. / Нимәләрҙер әүәҫ булыу. *Йоҡларға яратыу. Уйнарға яратыу.* ■ *Мин һыуҙың урғылып аҡҡан урындарын ҡарап ултырырға яратам.* Д. Юлтый.

**4.** Ниндәйҙер шартҡа ҡулайлашҡан булыу (хайуандар, үҫемлектәр һ. б. тураһында). *Сейә әзбизле тупраҡты ярата.*

**ЯРАТЫУ** [2] *к.* Барлыҡҡа килтереү, тыуҙырыу, тормошта бар итеү. *— Алла шулай яраҡҡас, бер нәмә лә эшләп булмай.* И. Насыри. *Был донъя бер нәмә лә яңғыҙ итеп яратмаған шул.* Т. Килмөхәмәтов.

● *Ҡатайҙы дауға яратҡан, бөрйәнде яуға яратҡан.* Әйтем.

**ЯРАТЫУ** [3] *к.* Туҡлыҡлы аҙыҡ ашатып, махсус рәүештә тәрбиәләп кәүҙәһен еңеләйтеп атты ярышҡа, бәйгегә әҙерләү. *Һабантуйға ат яратыу.* ■ *Ырымбурға барғас, йүгертеү алдынан Аласабырҙы яратҡандар.* Ж. Кейекбаев. *Шул көндән һуң атайым Ҡола ҡашҡаны бәйгегә ярата башланы.* С. Кулибай.

**ЯРАТЫУ** [4] *к.* Ярарлыҡ итеп килештереү, тап килтереү. *Йоҙаҡҡа асҡыс яратыу. Аяҡҡа туфли яратып булмай.*

**ЯРАТЫШЫУ** *к.* Бер-береңде яратыу [1]. *Яратышып ғүмер итеү. Яратышып өйләнешеү.* ■ *Уралбай менән Һылыубикә бала саҡтан уҡ бер-береһенә ҡатнашып үйнаған, яратышҡан* (Хикәйәттән).

**ЯРАУ** [1] *к.* **1.** Ниндәйҙер маҡсатҡа, эшкә файҙаланыу өсөн яраҡлы булыу, билдәле бер талапҡа яуап биреү. *Эшкә ярау.* ■ *[Мулла:] Гөлйөҙөм һинең улыңа хәләл ефетлеккә ярамай, сөнки ул сит егет ҡулында.* Һ. Дәүләтшина. *Мин матрос булырға бик теләнем, ләкин алманылар, ярамайһың, тинеләр.* Д. Юлтый.

**2.** Таман булыу, тап килеү. *Итек аяҡҡа ярау.* ■ *Гәрәйҙең алмаш күлдәк-ыштаны юҡ ине. Үҙ баҙарын төшөрмәҫ өсөн был турала ул хужаға әйтмәне.. Шәүәлиҙең күлдәк-ыштаны барыбер уға ярамаҫ ине.* Б. Бикбай.

**3.** Әҙәпкә, тәртипкә, ғөрөф-ғәҙәткә һ. б. ярашлы булыу; мөмкин булыу. *Тәмәке тартырға ярамай.* ■ *[Ғәтиә — Самсонға:] ..Зөләйхаға ниңә үпкәләттең, улай яңы ғына танышып, хәҙерҙән үк үпкәләшеү ярамаҫ, күңелен тап.* Т. Йәнәби. *Таймөрзин [Сәғиҙәне] биленән ҡосаҡлап алды. Сәғиҙә .. бөтә көсө менән уны этәреп тә ҡараны. «Кәрәкмәй, ярамай, кеше күреп ҡалыуы бар..»* М. Тажи. *Арыҫландай егет эй булһаң да, кәңәш итмәй эшләү ярамай* (Халыҡ йырынан).

**4.** Эшең, ҡылығың менән кемгәләр хуш килеү; оҡшау. *Бисәгә ярау. Иргә ярау. Ҡәйнәгә ярау. Түрәгә ярау.* ■ *[Сулпан:] Абау,.. ҡайһылай ялағайланып, бай бисәһенә ярауың етәр. .. Мин һинең һымаҡ, ярты ҡашыҡ ҡатыҡҡа кеше ошаҡлап .. ярамһаҡлы булғаным юҡ — тине.* Т. Хәйбуллин. *Һылыулыҡ та менән ярамайҙар, ҡуштан булыу менән ярайҙар* (Халыҡ йырынан).

● *Биргән бейгә яраған, бирмәгән кемгә яраған.* Әйтем. *Бөгөнгө аҡыл иртәгәгә ярамай.* Мәҡәл. *Иргә яраған миргә ярар.* Әйтем. *Йорттағы уй юлға ярамай.* Әйтем. *Көйһөҙ кейәүгә ай ҙа ярамай, көн дә ярамай.* Әйтем. *Тура әйткән туғанына ярамаған.* Әйтем.

**ЯРАУ** [2] *и.* **1.** Сара, хәстәр. *Юл ярауы күреү.* ■ *Туйҙы тиҙ булдырыу өсөн туй ярауын күрә башланылар.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** *күсм.* Тәбиғи йомош; хәжәт. *Кесе ярау. Оло ярау. Ярау итеү.* ■ *Хәби .. Сурағолға әйләнде: «Атаһын, әсәһен, әйтерһең, Хәби бай үлтергән. Уларҙың ҡәберe өҫтөнә барып ярау итергә гәрләнәм мин, әгәр белгең килһә».* Т. Хәйбуллин.

**ЯРАУ** [3] *с.* Яуға, бәйгегә һ. б. ярарлыҡ итеп махсус рәүештә әҙерләнгән, тәрбиәләнгән; яратылған. *Ярау ат. Ярау юрға.* ■ *Кинйәләрҙең эргәһенән генә ярау аттарға атланған яугир башҡорттар үтеп китте.* Ғ. Ибраһимов. *Яҙ ебәреп, көҙ менгән яҡшы ярау байҙа бар* (Ҡобайырҙан).

**ЯРАУАЙ** [*рус.* яровой] *с. ҡар.* **яҙғы** 2. *Ярауай бойҙай.*

**ЯРАУАЙЛАШТЫРЫУ** *к.* Сығышын һәм үсешен яҡшыртыу өсөн орлоҡто сәсер алдынан эшкәртеү. *Ярауайлаштырып сәсеү.*

**ЯРАШ** *и.* Ниндәйҙер шарттар менән үҙ-ара килешкән, ярашҡан хәл һәм шуны нығытҡан ҡағыҙ; килешеү. *[Батша] япон менән, бөтә һорағандарына риза булып, хурлыклы яраш яһай һалды ла, үҙенең Рәсәй халкы менән һуғышырға кереште.* Һ. Дәүләтшина.

**ЯРАШЛЫ** *с.* Нимәгәлер тап килгән. *Тәбиғәт шарттарына ярашлы. Ярашлы рәүештә. Ярашлы булыу. Ярашлы итеү.*

**ЯРАШТЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **яраштырыу**[2]. *Яраштырылған аш. Аш яраштырылды.* ■ *Яраштырылған аш уңып сыкты. Аппаҡ ондан дүрткелләп, шакмаклап ҡырҡылған һалма һалынған.* Т. Хәйбуллин.

**ЯРАШТЫРЫУ**[1] *к.* Боҙолошҡан кешеләрҙе килештереү. *Ә бына Йомагол менән [Ямалдың] икеһенең араһын яраштырыр кәрәк.* М. Тажи. *Ике асыулы бергә килһә, яраштырған һары бал, ике сәсән бергә килһә, һайраштырған һары бал* (Ҡобайырҙан).

● *Бар яраштырыр, юк талаштырыр.* Әйтем.

**ЯРАШТЫРЫУ**[2] *к.* Тәрбиәләп, бешереп әҙерләү (аш-һыуға ҡарата). *Аш яраштырыу. Тамакка яраштырыу.* ■ *Бибисара .. сулпыларын сылтырата-сылтырата аш яраштырырга тотондо.* Я. Хамматов. *Ҡыҙҙар үҙҙәренән ит, май, корот алып килеп, ашарға яраштыра* (Әкиәттән).

**ЯРАШЫУ**[1] *к.* **1.** Боҙолған араны төҙәтеү, татыулашыу; килешеү. *[Рәхимә:] Улар [балалар] ни, көсөк кеүек: хәҙер талаша, хәҙер яраша.* Һ. Дәүләтшина. / Ни менәндер риза булыу; килешеү. *Малай караштары һис яраштаҫ күпме ялган менән яраштым.* Р. Бикбаев.

**2.** *лингв.* Үҙ-ара тап килеү. *Өндәрҙең тәбиғи ярашыуы халыҡ йырҙарында, әлбиттә, йыш осрай.* К. Мәргән.

● *Ағай-эне талашыр, атка менһә ярашыр.* Мәкәл.

**ЯРАШЫУ**[2] *и. кар.* **килешеү**[4]. *Ярашыу яһау.*

**ЯРАШЫУ**[3] *и. грам.* Эйәреүсе һүҙҙең эйәртеүсе һүҙ менән бер үк затта һәм һанда килеүе.

**ЯРБАҠТЫ** *с. диал.* Алсаҡ, илгәҙәк. *Ярбакты кеше. Ярбакты булыу.*

**ЯРБАН-ЙОРБАН** *р. диал.* Ялп-йолп.

**ЯРҒАҠ** *и.* **1.** Ҡатҡан тире йәки күн. // *Ярғак тун.*

**2.** *с. мәғ.* Ҡаҡса, асҡаҡ. // *Ярғак бит. Ярғак кәүҙә.* ■ *Әхмәт ярғак кына булһа ла, Мырсабайға бирешерҙәй түгел ине.* И. Ғиззәтуллин.

**ЯРҒАҠЛАНЫУ** *к.* Ярғаҡҡа (2 мәғ.) әйләнеү, ярғаҡ булыу.

**ЯРҒАНАТ** *и.* Һөтимәрҙәр ғаиләһенә ҡараған ҙур яры ҡанатлы төнгө йәнлек. *Ниңә көндөҙ османың һуң, әй акылһыҙ ярғанат? Хәл йыйып, йоклар вакытта һин йөрөйһөң осколап.* Ш. Бабич.

**ЯРҒЫЛАУ** *к.* Урын-урындан буйҙан-буйға ярыу. *Такта ярғылау. [Әбүзәр:] Вәт, елле ағас! Йыйып ярғылаһаң, күпме тыранса сығыр ине.* Я. Хамматов. *Аяғымды ярғыланы Корея таш-лыктары* (Бәйеттән).

**ЯРҒЫС** *и. һөйл.* Ниҙе лә булһа яра торған ҡорал-ҡорамал. *Такта ярғыс. Ярма ярғыс.*

**ЯРҒЫСЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **ярғыслау.** *Ярғысланған такта. Ярғысланып бөтөү. Иҙәндәре тишелеп ярғысланып бөткән.*

**ЯРҒЫСЛАУ** *к.* Урын-урындан буйҙан-буйға ярыу; ярғылау. *Ел, һыу, эҫе һәм һыуыҡ быуаттар буйына һандыҡташты ла сатнатып, ярғыслап бөтөргән.* «Совет Башҡортостаны», 1967, 8 декабрь.

**ЯРҘАЙ** *с.* Ҙур, эре. *Ярҙай һыйыр. Ярҙай булып үҫеү.* ■ *Ҡатындар .. тарының ярҙай булып уңғанлығына хайран калып карап торҙолар.* Ж. Кейекбаев. **Ярҙай халыҡ** күп булып, мөһабәт торған халыҡ. *[Салауат:] Атамдан мине һуктырып, ярҙай халыҡ алдында намыҫымды тапатып, күңелегеҙ булмаһын!* М. Буранғолов.

**ЯРҘАМ** *и.* Матди йәки рухи йәһәттән күтәреү рәүешендә күргән сара. *Ҙур ярҙам. Ярҙам алыу. Ярҙам булыу. Ярҙам күрһәтеү. Ярҙамға мохтаж булыу.* ■ *Бер баш малһыҙ, ағай-эне ярҙамынан башка донъя көтөп китеүҙәре бик кыйын ул.* Һ. Дәүләтшина. *Яраланған һалдаттар тулып ята. Уларға ярҙам бирергә мөмкинлек юк.* Д. Юлтый.

□ **Ярҙам итеү** ярҙам сараһы күреү; ярҙамлашыу. *Алтын балыҡ яр буйына килеп сыккан да: «Бушка кайғырма, егет, мин һиңә ярҙам итәм»,— тигән* (Әкиәттән).

♦ **Ашығыс ярҙам** яралы йәки ауырыу кешегә тиҙ күрһәтелгән медицина ярҙамы. *Ашығыс ярҙам машинаһы. Ашығыс ярҙам сакырыу.* **Тел ярҙамы** *кар.* **тел. Хоҙай ярҙам бирһен** *шул уҡ* **алла ярҙам бирһен** (*кар.* **алла**). **Ярҙам ҡулы һуҙыу** иң кәрәк саҡта ярҙам күрһәтеү. *Сәлмән ағай донъяның әсеһен-сөсөһөн татыған кеше. Былай иптәшлек яғынан бик якшы.., мохтаж сакта ярҙам кулын һуҙырға әҙер торған бер эшсе.* Т. Йәнәби.

**ЯРҘАМЛАШЫУ** *к.* Ярҙам күрһәтеү; ярҙам итеү. *Укыуҙа ярҙамлашыу. Эштә ярҙамлашыу. Ярҙамлашып йәшәү.* ■ *Арала иң йәше — Исхак. Ул кымыҙ бейәләрен көтөргә Үмәр картка ярҙамлаша.* Ш. Янбаев.

**ЯРҘАМЛЫҠ** *с. лингв.* Һөйләм һәм һүҙҙәр араһындағы төрлө грамматик бәйләнеште үтәгән. *Ярҙамлык исем. Ярҙамлык кылым. Ярҙамлык һүҙ.*

**ЯРҘАМСАН** *с. диал.* Ярҙамсыл. *Ярҙамсан кеше. Ярҙамсан булыу.*

**ЯРҘАМСЫ** *и.* **1.** Эштә, тормошта һ. б. нимәгәлер булышлыҡ иткән, ярҙамлашҡан кеше. // *Ярҙамсы эшсе.* ■ *[Һөнәрсе:] Миңә ярҙамсы кәрәкмәй. Әгәр мин был эштә кеше ярҙамынан файҙаланһам, күңелемдән илаһи нур касыр.* З. Биишева.

**2.** Етәксегә туранан-тура буйһоноп, уға ярҙам иткән вазифалы кеше. *Капитан ярҙамсыһы. Машинист ярҙамсыһы. Тракторист ярҙамсыһы. Ярҙамсы булыу. Ярҙамсы итеп ҡуйыу.*

**ЯРҘАМСЫЛ** *с.* Ярҙам итеүгә ихлас, кешегә ярҙам итеүсән. *Ярҙамсыл кеше. Ярҙамсыл булыу.* ■ *Халык бик ярҙамсыл. Өй бурау, йәштәргә башлап донъя короп ебәреү кеүек катмарлы-*

*рак тормош мәсьәләләрен бер-береһенә таянып хәл итә.* Х. Назаров.

**ЯРҘАУ** *и. диал.* Кәштәләнеп торған текә яр.

**ЯРҘЫҠАС** *и. диал.* Ярлы.

**ЯРҘЫРЫЛЫУ** *к. төш. кар.* **ярҙырыу.** *Ярҙырылған таҡта.*

**ЯРҘЫРЫУ** *к. йөкм. кар.* **ярыу** [1]. *Таҡта ярҙырыу. Ярма ярҙырыу.*

♦ **Эре ярҙырыу** *шул уҡ* **эре сирттереү** (*кар.* **сирттереү**).

**ЯРИӘ** *и. кар.* **йәриә.**

**ЯРҠА** *и.* **1.** Ярған утын ағасы. *Һурелә төшкән сыуалға бер нисә ярҡа утын өҫтәнем.* С. Кулибай. / Ни ҙә булһа яһау өсөн ярып әҙерләнгән ағас. *Ярҡа ярыу.* ▬ *[Салих:] Туғын заводына ярҡа юныусы булып керҙем.* Ғ. Хәйри. *Саңғы юныр өсөн ярҡа әҙерләргә тотондолар.* Н. Мусин.

**2. ярҡалай, ярҡа кеүек** Бик ныҡлы, эре кәүҙәле, ҙур, һауһаҡ. *Бынау кеше ярҡа кеүек. Һыйыры ярҡалай.*

● *Бай балаһы маңҡалай, ярлы балаһы ярҡалай.* Мәҡәл. *Ярлы өҫтөнә ярҡа йығылыр.* Әйтем.

**ЯРҠАЙЫУ** *к.* Ныҡлы, йыуан булыу. *Ярҡайып үлтырыу.*

**ЯРҠАЛАУ** *к.* Ярҡа итеү. *Ярҡалап ярыу.*

**ЯРҠЫРАУ** *к. диал.* Ялтырау. *[Буҙйегеттең] гәзиз йәне ҡыйналып ергә төштө, айҙай йөҙө ярҡырап ергә төштө.* «Буҙйегет».

**ЯРЛАНЫУ** *к.* Яр һымаҡ, текә, бейек булыу. *Ашлыҡ бөтә яланды күҙ күреме ерҙән былай ҡаплап, йәм-йәшел булып, ярланып ята.* Һ. Дәүләтшина.

**ЯРЛАУ** *и.* **1.** Ярға оҡшап торған текә урын. *Тирә яҡта ҡуйы урман, тәрән ярлауҙар.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Һыу төбөндәге ҡапыл текә булып төшкән ер; ялдым. *Һыйырҙар йылға аша сыға башланы.. Ағым бер һыйырҙы түбәнләтеп алып китте. Ә аҫта ярлау.* Ә. Вахитов. *Һуҡмағым мине тәрән бер ярлауға килтереп сығарҙы, уның төшөр ере үтә текә ине* (Әкиәттән).

**ЯРЛЫ** *с.* **1.** Йәшәү өсөн мөмкинлеге етерлек түгел, донъя кәрәге бик етешһеҙ; фәҡир; *киреһе* бай. *Ярлы кеше. Ярлы халыҡ. Ярлы тормош. Ярлы булыу. // Ауыл ярлыһы. // Ярлы йәшәү.* ▬ *Мин ярлы ҡыҙы шул, һин мине һанға һуҡмаһың [тине Зөләйха].* Т. Йәнәби. *Тимер, Яҡуп .. һәм ауылдың тағы бер нисә ярлыһы өйгә керҙеләр.* Б. Бикбай.

**2.** *күсм.* Составында кәрәкле матдәләр, минераль тоҙҙар һ. б. кәрәкле нәмә әҙ, уңдырышһыҙ. *Ярлы тупраҡ. Ярлы руда.*

**3.** *күсм.* Һай йөкмәткеле; эстәлеге сикле (сәнғәт нәмәләренә ҡарата). *Ярлы фекер. Ярлы әҫәр. Пьесаның икенсе күренеше ярлы. // Ярлы һүрәтләнеү.*

♦ **Ярлылар комитеты** *тар.* 1918 йылдың 11 июнендә сығарылған декрет буйынса ауыл ярлылары араһында ойошторолоп, ауылда Совет власын нығытыуҙа ҙур роль уйнаған ойошма. *Былтыр бөтә волоста ауыл советтарын яңынан һайлап, көскә таҙартып, үҙебеҙҙең ярлы-ябағайҙан ярлылар комитеты төҙөп бөттөк тигәндә сеxы, шунан Колчагы килеп сыҡты.* Һ. Дәүләтшина.

● *Бай — бай өсөн тырышыр, ярлы — ярлыға булышыр.* Әйтем. *Байға барымта юҡ, ярлыға ҡарымта юҡ.* Мәҡәл. *Байға ялынам тип, ярлының йөҙ һумлыҡ хаҡы сыҡты.* Әйтем.

**ЯРЛЫҠ** *и.* **1.** *тар.* Хандарҙың яҙма бойороғо. *Мәсем хандан ебәрелгән хат ҡып-ҡыҫҡа, ҡыпсаҡтарҙың батыры Бабсаҡҡа хан ярлығын ишеткән һуң.* «Күсәк бей».

**2.** Төрлө нәмәгә, тауарға атамаһын, күләмен, эшләнгән урынын һ. б. мәғлүмәттәрен яҙып йәбештергән ҡағыҙ. *Багаж ярлығы. Шешә ярлығы.* / *күсм. һөйл.* Ғәҙәттәге ҡалып буйынса кемгәләр бирелгән баһа. *Ярлыҡ йәбештереү.*

**ЯРЛЫҠАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **ярлыҡау.** *Мөхәббәт бөтәһен дә аҡлата, ярлыҡата.* М. Кәрим.

**ЯРЛЫҠАУ** *к.* Ғәйеп-гөнаһты ғәфү итеү; кисереү. *Ҡарсыҡ .. намаҙ уҡыны. Тәңреһенән ярлыҡау һораны, ҡыҙының бәхетле булыуын теләне.* Ғ. Хәйри. *Мәскәүҙең ҙур батшаһы, бөтә боласыларҙы ярлыҡайым, тип, илгә хәбәр ташланы.* «Юлай менән Салауат».

● *Ят ярлыҡамаҫ, үҙеңдеке үлтермәҫ.* Әйтем.

**ЯРЛЫҠАШ** *и.* Бойороҡ менән билдәләнгән рәсми бүләк. *[Сөләймән старшина — Батыршаға:] Һеҙҙе тотҡан кешегә мең һум ярлыҡаш тәсдиҡ ҡылынған.* «Батыршаның хаты».

**ЯРЛЫЛАНДЫРЫУ** *к.* Ярлыға әйләндереү, ярлы итеү. *Кешене ярлыландырыу.*

**ЯРЛЫЛАНЫУ** *к.* **1.** Ярлыға әйләнеү; фәҡирләнеү. *Бик ярлыландылар, ауыҙҙарын асһа, үпкәләре күренеп тора.* Д. Юлтый.

**2.** *күсм.* Сифатында, составында кәрәкле нәмәләр, тоҙ һ. б. әҙәйеп, ярлыға әйләнеү. *Ярлыланған тупраҡ. Баҫыуҙар ярлыланған.*

**ЯРЛЫЛЫҠ** *и.* Ярлы (1 мәғ.) булған хәл; фәҡирлек. *Ярлылыҡта йәшәү. Ярлылыҡ менән ғүмер итеү.*

**ЯРЛЫҺЫНЫУ** *к.* Ярлыға һанау. *Ҡыҙҙың атаһына барһалар, Моңкилмәҫте ярлыһынып, риза булмай тора, ти* (Әкиәттән).

**ЯРЛЫ-ЮҠҺЫЛ** *и. йыйн.* Ярлы һәм юҡһылдар. *Ярлы-юҡһыл булыуҙарына ҡарамаҫтан, бай ягына ауып, үҙҙәрен Сурағол яҡлыларға тере дошман күрһәтә[ләр].* Т. Хәйбуллин.

**ЯРЛЫ-ЯБАҒАЙ** *и. кар.* **ярлы-ябағы.** *1704-1706 йылдарҙа көрәште башлыса ярлы-ябағай алып бара.* И. Аҡманов.

**ЯРЛЫ-ЯБАҒЫ** *и. йыйн.* Ярлы халыҡ. *Тирә-яҡтағы ауылдарҙың ярлы-ябағыһы хоҙайҙың бирмеш көнөндә уға [баярға] тамаҡ хаҡына эшләгән.* М. Тажи.

**ЯРЛЫ-ЯЛПЫ** *и. йыйн.* Ярлы халыҡ. *Ярлы-ялпының елеген һурғандан-һурҙылар.* Т. Хәйбуллин.

**ЯРЛЫ-ЯПАН** *и. йыйн.* Ярлы халыҡ. *Көслө, форсатлыға ләззәт, хилүәт, ялпы-япан өсөн тормош тар.* С. Кулибай.

**ЯРМА** *и.* Төрлө бөртөклө культураларҙың орлоғон төйөп, һурҙырып, ярып йәки бөтөн көйө әҙерләнгән аҙыҡ. *Арпа ярмаһы. Дөгө ярмаһы. Һоло ярмаһы. Ярма бөртөгө. Ярма төйөү. Тары ярмаһынан бутҡа бешереү.* ▬ *Бәләкәй бер тоҡсайға ун ҡаҙаҡ самаһында ярма һалып, уның*

*эсенә түтәрәм ҡаҙ менән бергә ярты ҡаҙаҡ самаһы түң май һалынды.* М. Ғафури. **Ярма елгәргес** һыҙырылған ярманы кәбәгенән айыра торған машина. **Ярма һыҙырғыс** ярма ашлығының ҡабығын һыҙыра торған машина.

◆ **Ярма ҡар** ярма һымаҡ бөртөкләнеп торған ҡаты ҡар. *Тышта көслө ел. Шәрә ҡалған тирәктәрҙең остары сайҡалалар, ярма ҡар өйөрмәләре һеперелә.* Б. Бикбай. **Ярма ярыу** арттырып, ҡабартып һөйләү; эре сирттереү.

● *Йөрөгән аяҡҡа йүрмә, йүрмә булмаһа ярма эләгә.* Мәҡәл. *Өмөтһөҙҙөң итәгенә ярма һалһаң, абына-һөрөнә түгер.* Әйтем.

**ЯРМАҠ** *и.* Боронғо аҡса берәмеге. *Бер ярмаҡ. Ике ярмаҡ. Ярмаҡ коло булыу.*

**ЯРМАЛАНДЫРЫУ** *ҡ.* Ярмалыға әйләндереү, ярмалы итеү.

**ЯРМАЛАНЫУ** *ҡ.* **1.** Күпереп таралып тороу (тупраҡҡа ҡарата). *Тимерҡаҙыҡ .. баҫҡан һайын батып барған йомшаҡ тупраҡты усына алып йомарланы. Тупраҡ ярмаланып, таралып тора.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** Эреп ҡатып таралып тороу. *Әхирәте яңы бал тине бит. Шуны белә тороп [Шәмсибанат карсыҡ], уның алдына ярмаланып бөткән иҫке бал килтереп ултыртһын?!* Ғ. Байбурин. *Ҡояш йомартлана, ә ҡар көпшәкләнә һәм ярмалана бара.* «Совет Башҡортостаны», 1988, 1 март.

**3.** Бешкәндә иҙелеп таралыу (картуфҡа ҡарата). *Ярмаланып бешеү.* ■ *Ярмаланып, ярылып бешкән, боҫо сығып торған йәш картуфты татығандай булам.* Х. Әхмәтов.

**ЯРМАЛАУ** *ҡ.* Ярма һалыу, ярма ҡушыу, ярмалы итеү. *Бәлеште ярмалап бешереү.*

**ЯРМАЛЫ** *с.* **1.** Ярма ҡушылған. *Ярмалы бәлеш. Ярмалы ҡабаҡ.*

**2.** Ярмаланып торған. *Ярмалы картуф. Ярмалы тупраҡ.* ■ *Хәбибуллин апаһы бешергән ярмалы картуфтың тәмен дә татып ҡарамай .. юлға сыҡты.* Х. Ғиләжев.

**ЯРМАН** *и. һөйл. ҡар.* **герман.** *Ярман һуғышы.* ■ *Аҡ һаҡаллы ҡарттар .. әкрен генә һөйләйҙәр. Ярманға ҡаршы һуғыш иғлан ителгән, тиҙәр.* Ғ. Хәйри.

**ЯРМАШЫУ** *ҡ. диал.* Ҡул менән йәбешеү.

**ЯРНА** *и. иҫк.* Кире ҡайтарылмай торған ярҙам.

◆ **Ярнаһын биреү** ҡоһорон ҡайтарыу. *Ҡыш буйы эшләмәй ятҡандың ярнаһын бирәбеҙ.*

● *Ярна һораған көн күрмәҫ, ҡаҙна һораған ил уңмаҫ.* Мәҡәл.

**ЯРОВОЙ** [*рус.*] *с. ҡар.* **яҙғы** 2.

**ЯРПАЙТЫУ** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ярпайыу.** *Төлкө тунды ярпайтып асып, йәйрәп барған Ныязғол .. Тимер ҡартҡа ҡарамай ғына көлдө.* Һ. Дәүләтшина.

**ЯРПАЙЫУ** *ҡ.* **1.** Киң йәйелеү; йәйрәү. *Ярпайып ултырыу.*

**2.** Йөҙ асылыу, матурайыу. *Ярпая башлау.*

● *Яманға төшкән ҡартайған, яҡшыға төшкән ярпайған.* Әйтем.

**ЯРПАЙЫШЫУ** *ҡ. ҡар.* **ярпайыу** 1. *Ярпайышып ултырып сәй эсәләр.*

**ЯРПЫ** *и.* Бөтөн нәмәнең бәләкәй бер өлөшө, ҡыйырсығы, ҡыйығы. *Балаҫ ярпыһы. Кейеҙ ярпыһы. Ит ярпыһы.* ■ *Баш осонда зәңгәр күк ярпыһы күренеп ҡалды.* Ш. Янбаев. *Әсәйем тун ярпыһы һалып ямап биргән быйма табаны еүеш ҡарға тейеп, таҡыя кеүек ләпшәйгән.* Й. Солтанов.

**ЯРПЫҠ** *и. ҡар.* **ярпы.** *Ярпыҡ болот артынан ай бер юғала, бер ҡалҡа.* С. Кулибай.

**ЯРПЫЛДАУ** *ҡ.* Ялбыр-йолбор килеү; елпелдәү. *Итәге ярпылдап китеп бара.*

**ЯРПЫСАҠ: ярпысаҡ ҡарын** *диал.* таҙғарын.

**ЯРСЫ** *и. тар.* Боронғо башҡорт йәмғиәтендә халыҡҡа иғлан белдереүсе, ҡысҡырып хәбәр итеүсе. *Бына берәү: «Һә-әй мосолмандар!» — тип һуҙып ҡысҡырҙы. Ярсы икән.* А. Таһиров. *Урамда ҡысҡырған ярсыны ишетеп, Бикбау уҡ-һаҙағын йәтешләп ала.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**ЯРСЫҠ** *и.* **1.** Нимәнәндер ярылып бүленгән киҫәк, ватыҡ. *Быяла ярсығы. Көршәк ярсығы. Мина ярсығы. Сынаяҡ ярсығы. Кирбес ярсығы. Ҡорос ярсығы. Туп ярсығы.* ■ *Гөлъямал .. көҙгө ярсығына ҡарап, туҙған сәсен үрергә тотондо.* Я. Хамматов. *Беҙҙе әҙләп килгән мина ерҙе уйып ярылды. Бер ярсығы минең тәнде бүҫте, береһе яраланы ҡайынды.* Я. Ҡолмой.

**2.** *күсм. һөйл.* Ниндәйҙер бер зат-ырыуҙың бер ҡалдығы, нәҫел-нәсәбе. *Ә Ҡырмыҫҡалы һәм Зиансура янындағы Таҙлар .. бәлки шул уҡ ҙур Таҙлар исемле кәбиләнең ярсығылыр?* Й. Гәрәй. *[Ҡарт:] — Ярай, мин әле Сура батырҙың ярсығы ҡалып, атаһының ҡоно өсөн барымта алдымы икән, тип уйлағайным* (Әкиәттән).

**ЯРСЫҠЛАНЫУ** *ҡ.* Ярсыҡҡа әйләнеү, ярсыҡ-ярсыҡ булыу.

**ЯРСЫҠЛАУ** *ҡ.* Ватып ярсыҡҡа әйләндереү, ярсыҡ-ярсыҡ итеү. *[Аҙнай:] Бына хәҙер күҙҙәремде бәйлә, ун аҙымдан ҡыл тартҡандай барып, көршәгеңде ярсыҡлайым.* Ҡ. Даян.

**ЯРСЫЛЫУ** *ҡ.* Ярсыҡ булып ярылыу, сатнау. *Мал булғаны бирле байтаҡ ергә уйылып ҡалды атым тояғы, ул баҫҡанда таш ярсылып ҡалды, ергә батты үлән ҡыяғы.* М. Илбаев.

**ЯРТЫ** *и.* **1.** Нимәнелер тигеҙ итеп икегә, урталайға бүлгәс булған бер өлөшө. *Айҙың ярты̇һы. Ғүмерҙең ярты̇һы. Ҡыштың ярты̇һы үтте. // Ярты икмәк. Ярты ауыл. Ярты йыл.* ■ *[Хужа:] Ҡола бейә китте,.. 95 һумға һаттым. Бының ярты аҡсаһына өй ҡыйыҡлайбыҙ.* Т. Йәнәби. *Аҡназар .. ит боҙҙо. Гөлбоҫтан уны бүлеп, ярты̇һын Хәмди еңгәләренең ҡаҙанына алып барып һалды.* Ғ. Дәүләтшин. *Йөкмәп донъя яҙмышын һин,.. ҡыҙырып сыҡтың ярты ер шарын.* М. Кәрим.

**2.** Сәғәттең 30 минутҡа тура килгән ваҡыт дәүмәле. *Өсөнсө ярты.* ■ *Мурзин түш кеҫәһенән сәғәт сығарып: «Өсөнсө ярты»,— тине.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** *һөйл.* 500 г һыйышлы бер шешә араҡы. *Мин яртыға йүгерҙем. Еңгәгеҙ аш ултыртырға әҙерләнде.* Ф. Иҫәнғолов.

◆ **Ярты аҡыл** аҡылға еңел, аҡылы кәм. **Ярты яҡ** *ҡар.* **яҡ** [1] 5.

● *Батырлыҡ ярты бәхет.* Мәҡәл. *Яҙғы көн — ярты аҡыл.* Әйтем. *Яҡшы һүҙ ярты ырыҫ.* Мәҡәл.

**ЯРТЫ-ЙОРТО** *с.* **1.** Тейешле күләм-дәүмәле кәм, тулы булмаған. *Ярты-йорто тоҡ ашлыҡ.* ■ *Гөлдәр .. ярты-йорто биҙрә һыуын сайпыл-*

*дырып, урамға инеп китте.* К. Кинйәбулатова.

**2.** *күсм.* Тулы сифатлы түгел, кәмселекле. *Ярты-йорто эш. Ярты-йорто булыу. // Ярты-йорто эшләү.* ■ *Ниндәйҙер ярты-йорто тойғолар менән йәшәү шағир кешегә үлем менән бер ул.* Н. Нәжми. *Ярты яҙыусы булғанса тулы кеше бул, туған, ярты-йорто шағир менән былай ҙа донъя тулған.* Б. Бикбай. *Ярты-йорто түйынғанға дәүләт кунмаҫ тимәгеҙ* (Кобайырҙан).

**ЯРТЫЛАЙ** *р. кар.* **яртылаш.** *Яртылай һөт, яртылай һыу кушыу.*

**ЯРТЫЛАП** *р.* Ярты итеп. *Икмәкте яртылап бүлеү. Яртылап бүләйек.*

**ЯРТЫЛАШ** *р.* **1.** Ярты күләмдә, яртыһына хәтле. *Яртылаш койоу.* ■ *Мүкләнгән, яртылаш серек, кәкре-бөкрө ағастар ята.* Я. Хамматов.

**2.** Бер өлөшләй, бер ни тиклем. *Өй эсе яртылаш каласа, яртылаш ауылса йыйыштырылған.* Д. Юлтый. *Хабрахман бабай .. яртылаш русса, яртылаш башкортса һөйләшә.* И. Ғиззәтуллин.

**ЯРТЫЛЫК** *и. һөйл.* Ярты литрлык бер шешә аракы. *Яртылык алыу.*

**ЯРТЫШАР** *бүл. һ.* Күләме, микдары ярты үлсәмгә тиң. *Яртышар алма.* ■ *Дөгө бутҡаһы ашаттылар, яртышар шешә кыҙыл аракы өләштеләр.* Д. Юлтый.

**ЯРУҒ** *и. иҫк.* Яктылык, якты. *[Ғәбдессәләм:] Ай кеби, көн кеби якты яруғтарға мохтаж ул [халык].* Ғ. Ибраһимов.

**ЯРУС** [*рус.*] *и.* **1.** Театр бинаһы эсендәге аҫлы-өҫлө теҙелгән урындар каты. *Өҫкө ярус.* / Берәй короламаның аҫлы-өҫлө урынлашкан бер төрлө өлөшө. *«Тыгыҙ, эҫе, бөркөү»,— тип, урта яруста яткан бер йыуан бисә мығырлап бара.* Д. Юлтый.

**2.** Ниҙеңдер аҫлы-өҫлө урынлашкан горизонталь рәте. *Яр буйҙарына ярус-ярус итеп, бүрәнә өйөп куйылған.* Ғ. Ибраһимов.

**ЯРУТ** *и.* Ялпак орлоклo, ак, ал тәлгәш сәскәле күп һәм бер йыллык кый үләне.

**ЯРҺҮҘ** *и. иҫк.* Асыулы һүҙ, сығыш. *Был ярһүҙҙән һуң бәгзе берәүҙәр күпмелер иҫәңгерәп калғандай. Кәнзәфәр бей йәнә бер нисә акһакал һүҙ алып һөйләй.* Ғ. Хөсәйенов.

**ЯРҺЫНЫУ** *к. кар.* **ярһыу** [1] 1, 2.

**ЯРҺЫТКЫС** *с.* Ярһыта торған; ярһытыусан. *Кайын шауы шулай ярһыткысмы, мөхәббәтме әллә иҫерткес.* М. Кәрим.

**ЯРҺЫТЫУ** *к.* Көслө тойғо менән кыҙҙырыу. *Йөрәкте ярһытыу.*

**ЯРҺЫУ** [1] *к.* **1.** Көслө тойғонан дәртләнеп, ашкынып йәки борсолоп нык кыҙыу, шашыу. *Ярһыған йөрәк. Ярһып сапкан ат.* ■ *Һай, Салауат, ир арыҫлан, иле өсөн түгеп көсөн ирек даулап ярһыған.* К. Даян. *Ул [Шафик] ярһып-ярһып өргән эт тауышына .. уянды.* Я. Хамматов.

**2.** *күсм.* Ҙур көс менән атлығыу; ашкыныу. *Ярһып ағыу.* ■ *Ярһып ташкан яҙғы ташкын һыуҙар түлкын-түлкын ярҙы кағалар.* Ғ. Амантай.

**3.** *күсм.* Нык боҙолоу (ярағa карата).

**4.** *кар.* **куҙғыу.**

**ЯРҺЫУ** [2] *с.* **1.** Көслө тойғоға, дәрткә бирелеп, нык шашкан. *Ярһыу йөрәк. // Йөрәктең ярһыуы баҫылыу.* ■ *Ул [Бабич] ярһыу күңеленә куктә лә тыныслык таба алмай.* Ғ. Хөсәйенов. *[Ат] көрт ярып эргәнән үтеп китте. Һай, йәш мал ярһыу шул!* Р. Солтангәрәев.

**2.** *күсм.* Ҙур көс менән ашкынып ағыусан. *Ярһыу йылға оҙон кыш буйына боҙ ситлектә ятып иреккән, инде хәҙер шашып, которонол, ләззәт ала яҙғы иректән.* Р. Назаров.

**ЯРҺЫУЛЫ** *с. кар.* **ярһыу** [2].

**ЯРЫ** [1] *и.* **1.** Үҫемлек йәки тереклек тәнендәге йока тукыма йәки тире катламы. *Ит ярыһы. Эсәк ярыһы.*

**2.** Эшкәртелмәгән тире. *Ярынан бейәләй тегеү. // Ярыбейәләй. Ярысалбар. Ярытун.* ■ *Киндер күлдәк, ярыыштан кейеп, яҙлы-көҙлө яланаяк .. йөрөй инек беҙ.* Н. Иҙелбай.

**3.** *диал.* Шекәрә. *Һөт ярыһы.*

◆ **Тауыш ярыһы** королдай эсендә булып, тауыш хасил итер өсөн хеҙмәт иткән ярғы.

● *Көҙ килгән кунакка йылкы каҙыһы, яҙ килгән кунакка карта ярыһы.* Әйтем.

**ЯРЫ** [2] *и.* Һан менән килеп, асык билдәләнмәгән урын йәки йүнәлеште белдерә: башка, бүтән. *[Сәхибә:] Ғариф хәҙрәт бер яры китеп барыр, һуңға калырға ярамай.* Ғ. Хәйри. *[Тимерйән — Сөйөмбикәгә:] Әйҙә ошонан туп-тура өйөбөҙгә кайтабыҙ.. Етәр, икебеҙ ике яры күп йәшәнек!* Ш. Янбаев.

● *Кырк кеше бер яры, кырын кеше бер яры.* Әйтем.

**ЯРЫЙ** *и. кар.* **яры** [2]. *Төрлө ярый таралышыу.*

**ЯРЫК** I *и.* Тар буй тишек. *Иҙән ярығы. Ер ярығы. Ярыкты пылау. Ярык яһау.* ■ *Кайҙалыр мейес артындағы бүрәнә ярығында өй сиңерткәһенең сикерләүен тыңлап ултыра торғас, Сәгиҙә .. уйға сумды.* М. Тажи. *Һыуҙар аға арыктан, кыҙҙар карай ярыктан* (Халык йырынан).

II *с.* Ярылған хәлдәге, ярығы булған. *Ярык бүрәнә. Ярык сынаяк. Ярык булыу.* ■ *Һинһеҙ тормош — кулымдағы ярык курай, ярык булғас, якшы итеп уйнап булмай.* М. Илбаев. *Бысак куйҙың осаһына тейеп, ярып ебәрҙе, ти. Быны шунан куйҙарҙың осаһы ярык булып калған, ти.* «Куҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

◆ **Ярык барабан** кешенән ишеткән хәбәрҙе башкаларға тиҙ еткерә, һөйләй торған, ауыҙында һүҙ тормаған кешегә карата әйтелә.

**ЯРЫК-ЙОРОК** [1] *с.* Төрлө ерҙәренән ярык. *Ярык-йорок такта.*

**ЯРЫК-ЙОРОК** [2] *и.* Һәр төрлө ярыктар. *Ярык-йороктан ел өрә.*

**ЯРЫКТЫК** *и.* Кешене мактап йәки яратып әйтә торған һүҙ. *[Карттар — Бикйән тураһында:] һай, ярыктык, ата юлын кыуа бит, тора-бара һунарсыларҙың мәргәне буласак, тинеләр* (Әкиәттән).

**ЯРЫЛКАС** *и.* Якшы дан; якшат, мәрхәмәт.

**ЯРЫЛКАСЛЫ** *с.* Якшатлы, хөрмәтле. *Ярылкаслы кеше.*

**ЯРЫЛЫУ** *к.* **1.** *төш. кар.* **ярыу** [1]. *Маруся ярылған үтындарҙы ташый башланы.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Киҫәккә йәки буйға сатнап, бөтөнлөк сифатын юғалтыу. *Боҙ ярыла. Быяла ярыла. Ағас ярыла. Уртаға ярылыу.* ■ *[Ҡатындар:] Гөлбоҫтан килен, бынауы кеүек ҡаҡ юлда арбанан ҡолап, Аҡназарыңдың башы ярылыр, алла һаҡлаһын.* Ғ. Дәүләтшин. *Бабай билендәге балтаһын алған да ташҡа һуҡҡан. Таш ярылып китҡән* (Әкиәттән). / Эске көстән сайрау йәки бүҫелеү; шартлау. *Туп ярыла. Мина ярыла.* ■ *Алыҫта бомба ярылды, тулҡыны бында килде.* Р. Ниғмәти. / *күсм. һөйл.* Ныҡ маҡтаныу. *[Карт:] Моратша старшина ярыла бит: «Мин көтөүселәр менән ярышып та тормайым»,— ти.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Ҙур булып йыртылыу. *[Айытбикә] буйға ярылған күлдәген бер нисә урындан ямап кейгән.* Т. Хәйбуллин. / Буйҙан-буй ике яҡҡа айырылыу. *Халыҡ уртаға ярылып юл бирҙе.* ■ *Ҡуҙыйкүрпәс камсыһын алып, уңға бер һелтәне, һулға бер һелтәне, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». / *күсм.* Ап-асыҡ булып беленеү. *Мал ҡураһы тирәһендә бүре эҙҙәре ярылып ята.* М. Тажи. *[Бабайҙың] һуҙҙәре минең күңелдә .. ярылып ҡалған.* Й. Солтанов.

**4.** Тире ҡоролоҡтан ҡытыршыға әйләнеү, кибеп сатнау. *Аяҡ ярыла. Ирен ярыла. Ҡул ярыла.* ■ *Ғата — тине Рөстәм һәм ярылып бөткән ҡулдары менән иптәшенең ҡулын ныҡ итеп ҡыҫты.* Н. Асанбаев.

♦ **Икегә ярылырҙай булыу** *шул уҡ* **ҡырҡҡа ярылырҙай булыу. Йөрәк ярылыу** *ҡар.* **йөрәк. Ҡырҡҡа ярылырҙай булыу** эш күплектән өлгөрә алмай ҡаңғырыу. **Эсе ярылғыр** *ҡар.* **эс. Ярыла яҙыу** *йәки* **ярылырҙай булыу** ни эшләргә белмәй аптыраныу. *Асыуҙан ярыла яҙыу. Ярылырҙай булып маҡтаныу.* ■ *Ҡандары ҡомарып, яралары тоҙланып килгән йыуан ҡорһаҡтар был һүҙҙе ишеткәс, ярыла яҙҙы.* Ғ. Дәүләтшин.

**ЯРЫМ** *һ.* **1.** Күләм һандың икенән бере. *Йыл ярым. Саҡырым ярым. Бот ярым. Бер ярым.* ■ *[Мин] тегеүсе Иванов семьяһында үткәргән ай ярым ғүмер тураһында уйланам.* Д. Юлтый.

**2.** *р. мәғ.* Ярты күләмдә; яртылаш. *Ярым ялангас. Ярым ҡараңғы өй.*

**3.** *һөйл.* Ҡайһы бер исемдәр менән ҡушма һүҙ яһай. *Ярым автомат. Ярым продукт. Ярым сүл өлкә. Ярым фабрикат яһау.*

**ЯРЫМ-ЙОРТО** *с.* Тейешле кимәл-дәрәжәнән кәм; ярты-йорто. *Ярым-йорто белем.* // *Ярым--йорто уҡыу. Ярым-йорто эшләү.* ■ *Уға бер ҡыҙҙың ярым-йорто ризалығы менән алтын йөҙөк алып бирҙеләр.* С. Агиш.

**ЯРЫМТЫҠ** *с. диал.* Эскерһеҙ. *Ярымтыҡ кеше.*

**ЯРЫМУТРАУ** *и.* Өс яҡтан һыу менән уратылып, бер яғы оло ергә тоташҡан ҡоро ер. *Ҡырым ярымутрауы. Ғәрәп ярымутрауы.* ■ *Беҙҙең эраның VII быуатында Ғәрәп ярымутрауында, хәҙерге Мәккә, Мәҙинә ҡалалары тирәһендә йәшәгән ғәрәп халҡы араһында ислам дине барлыҡҡа килә.* Т. Баишев.

**ЯРЫМШАР** *и.* **1.** Ер шары һәм күк йөҙөнөң шартлы рәүештә бүленгән икенән бер өлөшө.

**2.** Баш мейеһенең бер яҡ яртыһы.

**ЯРЫМ-ЯРТЫ** *с. ҡар.* **ярты-йорто.**

**ЯРЫУ** [1] *ҡ.* **1.** Ҡулдан төшөрөп йәки сатната һуғып, бөтөнлөк сифатын юҡ итеү; ватыу. *Сынаяҡты ярыу. Тәҙрәне ярыу.* ■ *Мәҙинә сәскәне ултыртам тигәндә төшөрөп ебәреп, банканы ярған.* Ш. Янбаев. *[Ҡаһым түрә] яуға сапҡан мәлдәрендә тау-таш ярыр йылдам ир ине* (Халыҡ йырынан). *Күҫәк менән туҡмалып, башың ярырға килдеңме?* «Бабсаҡ менән Күсәк». / Ҡабығын боҙоп, емен ашау. *Көнбағыш ярыу.* ■ *Зөләйха сәтләүекте артыҡ тауышын сығармай, аҡрын ғына яра.* Т. Йәнәби. / *күсм.* Ныҡ тынысһыҙлау; шаңғытыу. *Тынлыҡты ярыу. Ер ярып үкереү. Ҡолаҡ ярып ҡысҡырыу.* ■ *Һауа ярып мылтыҡ шартланы.* Р. Ниғмәти.

**2.** Буй-буй өлөшкә бүлеү. *Сыра ярыу. Таҡта ярыу. Утын ярыу.* ■ *Аҡбулат ҡарт ғүмер буйы ҡолға ҡырҡҡан да ҡыуғын ҡыуған, ҡарағай йыҡҡан да тыранса ярған* (Әкиәттән). / Урталай ҡырҡыу. *Картуфты ярып бешереү. Уртаға ярып бүлеү.*

**3.** Оҙон буй итеп йыртыу йәки йәрәхәтләү. *Күлдәктең итәген ярып ебәреү. Ҡолап тубыҡты ярыу.* ■ *Һаҙаҡ аҡһаҡ ҡоланың һыртын ярып, бер ҡолағының осон йырып барып сыға.* «Аҡһаҡ ҡола». / Оҙон буй итеп ике яҡҡа айырыу. *Сәсте ярып тарау.* ■ *Утарҙы уртаға ярып, һалҡын шишмә шылтырап ағып ята.* Һ. Дәүләтшина. *Дошмандың сафын ярып сыҡҡан ир Салауат Юлай балаһы.* Х. Ғәбитов. / Нимәнелер үтәнән-үтә йырыу. *Ҡар ярып атлау. Батҡаҡ ярып сығыу.* ■ *Төндө ярып йүнәлдем мин завод яғына.* Ғ. Сәләм. *Ҡул шаулатып, һыу ярып, ерҙә дауыл ҡуптарып, Аҡбуҙ сығыр — мал ҡото.* «Аҡбуҙат».

**4.** *күсм.* Ныҡ итеп туҡмау; һыҙырыу. *Сыбыртҡы менән ярыу.* ■ *Ул [Өлкаман] Айрасты кинәнеп яра башланы.* Ш. Насыров. *Меңгән кир юрғаһын яра һуғып, тағы шыр урманға юл тотҡан.* Б. Вәлит.

♦ **Ярма ярыу** *ҡар.* **ярма. Япраҡ ярыу** яҙ көнө япраҡ сығарыу (ағасҡа ҡарата). *Йәм-йәшел ҡырҙар йәшәрҙе ярҙы япраҡ бар ағас.* Ш. Бабич. **Ярып һалыу** күҙгә ҡарап, дөрөҫөн әйтеү. *[Кәбир:] Колхоз йыйылышында бөтәһен ярҙым да һалдым.* С. Агиш.

**ЯРЫУ** [2] *ҡ. иҫк.* Яҡтырыу.

● *Баталы ҡол арымаҫ, батаһыҙ ҡол ярымаҫ.* Мәҡәл.

**ЯРЫУ** [3] *и. диал.* Урай. *Түбәһендә ярыуы бар.*

**ЯРЫШ** [1] *и.* Уйындағы йәки эштәге кемуҙарҙан алып барылған көрәш. *Саңғы ярышы. Спорт ярышы. Һүҙ ярышы. Ярыш башлау. Ярыш асыу. Ярыш үткәреү. Ярышҡа сығыу. Фермалар араһында һөттө күберәк алыу өсөн ярыш бара.* ■ *Йөҙөү ярышында беренселекте һис бирмәйбеҙ.* Ғ. Сәләм.

**ЯРЫШ** [2] *р.* Үҙ-ара ҡабырғалаш; яҡын, бергә, эргәләш. *Ярыш ултырыу. Ярыш атлау.* ■ *Ярыш үҫкән ике йыуан ғына ботаҡ араһына нәҙегерәк ботаҡтарҙы һындырып һалып, йәтешләнеп ултырҙыҡ.* Н. Мусин.

**ЯРЫШЛАУ** *ҡ.* Эргәләш, ҡабырғалаш итеү. *Ярышлап барыу. Ярышлап килеү. Ярышлап ҡуйыу. Ярышлап ултырыу.* ■ *Улар ҡараңғы урамдан ярышлап атланы.* Я. Хамматов.

**ЯРЫШСЫ** *и.* Ярышта [1] ҡатнашыусы.

**ЯРЫШТЫРЫУ** *к. ҡар.* **ярышыу.** *Балаларҙы ярыштырыу.*

**ЯРЫШЫУ** *к.* Уйында йәки эштә кемуҙарҙан көрәшеү, алышыу; ярышта ҡатнашыу. *Өмәселәр шулай, эшләйҙәр ҙә ярышып бер тына, унан туҡтап, йырлап, шаярып алалар.* Ғ. Амантай. / Уйында йәки эштә алға сығырға тырышып, кем йәки ни менәндер уҙышыу. *Ырымбур ерәне ҡаҙаҡ турыһы менән тиңләшеп ярыша башланы.* Д. Юлтый.

**ЯРЫШЫУСЫ** *и.* Ярышта ҡатнашыусы.

**ЯР-ЯР** *и. этн.* Туйҙа әйтелә торған фольклор жанры. *Яр-яр ишетеү. Яр-яр тыңлау. Яр-яр әйтеү.* ■ *Ҡосаҡлашып көрештә ғашиҡ йәре, ҡашында ҡырҡ ҡыҙ бар, хеҙмәткәре, ҡыҙҙар тороп алдында яр-яр әйтеп, хан ҡыҙының табылды интизары.* «Буҙйегет».

**ЯСА́ЧНЫЙ** [*рус.*] *и. тар.* Яһаҡ түләүсе. *Тархан һәм служилый башҡорттар ясачныйҙарҙы хөкүмәткә буйһондороуҙа хөкүмәт ҡулында ҡорал хеҙмәтен үтәй ине.* Ғ. Фәхретдинов.

**ЯСИН** [*ғәр.*] *и. дини.* Кеше үлгәндә уҡый торған доға. *Ясин уҡыу.* ■ *«Мәзин икенсе тапҡыр ясин сыға. Иман менән генә үтһен инде, бисара»,— тип шыбырлай Сыуаҡай әбей.* З. Биишева.

**ЯСЛЕ** [*рус.* ясли] *и.* Өс йәшкә тиклемге балаларҙы тәрбиәләй торған ойошма. *Минән башҡа тағы бер ҡустым бар .. Бәләкәй әле, өсө лә тулмаған. Яслегә йөрөй.* Р. Низамов.

**ЯСУС** [*ғәр.*] *и.* **1.** Шымсы. *[Мазһар:] һаҡ булығыҙ, теге ясус килә.* Х. Ибраһимов.

**2.** Йәшерен полиция агенты.

**ЯҪАУЫЛ** *и.* **1.** Эш башҡарыусы, йомош башҡарыусы; йомошсо. *Батша таҙҙы килтерергә ҡушҡан. Яҫауылдар таҙҙы эҙләп табып, батшаға алып килгән* (Әкиәттән).

**2.** Революцияға тиклемге Россияла хәрби казактарға бирелә торған офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәне йөрөткән кеше (пехотала капитан дәрәжәһенә тура килгән).

**ЯҪҠЫЛ** *с. ҡар.* **яҫмаҡ.**

**ЯҪҠЫНЫУ** *к.* **1.** Тоторға, тибергә ынтылыу (йыртҡыс ҡошҡа ҡарата). *Ҡарсыға турғайға яҫҡына.*

**2.** *күсм.* Ниҙер эшләргә ынтылыу; киҙәнеү, янау. *Һүҙ әйтергә яҫҡыныу.* ■ *«Расихтың үҙен дөмбәҫләп ташлағанда, их, шәп булыр ине»,— тип, яҫҡынып ҡуйҙы берәү.* Ғ. Ғүмәр.

**ЯҪҠЫТЫУ** *к. ҡар.* **яҫҡыу** 2.

♦ **Ат яҫҡытыу** ат уйнатыу. *Бер килке ат яҫҡытып, танһыҡтары ҡанғанса уйнап алғанда, байтаҡ ҡына юл да үтелгән ине.* Ғ. Ибраһимов.

**ЯҪҠЫУ** *к.* **1.** Шыҡыйып төшөп эләктереү; тибеү. *Ҡошҡа сөйгән йылғыр ҡарсыға ла өстән артыҡ ҡошто яҫҡымай.* «Юлай менән Салауат». / Аймау, ҡармау. *Яҫҡып тотоп алыу.*

**2.** *күсм.* Ниҙер эшләргә ынтылыу; янау. *Күпте күргән олатай ҙа мылтығын яҫҡып ҡуя.* С. Кулибай. / Ниҙер эшләргә дәртләнеү. *[Рәми] быйылғы ярыштарҙа беренсе урынды алырға яҫҡып йөрөй.* Х. Мохтар.

**ЯҪҠЫШЫУ** *к.* Аймап, ҡармап тотошоу; көрмәкләшеү. *Шүлгән, Урал икәүһе бер-береһенә тап булған. Икәү-ара яҫҡышып, төрлө яҡлап алышҡан.* «Урал батыр».

**ЯҪМА** *и.* Сабып, буйҙан-буй һалынған иген. *Иген яҫмаһы. Арышты яҫмала киптереү. Арышты яҫмаға һалыу. Яҫманы йыйып һуғыу.* ■ *Урғыстар инде .. бойҙай ҡамылдарын ҡырҡып уҙғандар. Яҫмаларҙы ҡурыштырып оҙаҡ ятҡырмайҙар, йыйып һуға ла башлағандар.* Р. Низамов.

**ЯҪМАҠ** *с.* Яҫыға тартым. *Яҫмаҡ ер. Яҫмаҡ буйлы.* ■ *Утрау .. эре-эре яҫмаҡ таштарҙан торған ҡескәй генә ҡоро ер ине.* З. Биишева.

**ЯҪМАҠЛАНЫУ** *к.* Яҫмаҡ булыу. *[Тауҙың] түбәһе, күпереп бешкән эсе икмәк йөҙө һымаҡ, яҫмаҡланып тора.* Н. Мусин.

**ЯҪМАҠЛАУ** *к.* Яҫмаҡ хәлгә килтереү, яҫмаҡ итеү. *[Григорий] иплән кенә аҡсаның ситен әйләндереп-әйләндереп яҫмаҡлап сүкергә тотонҙо.* Н. Мусин.

**ЯҪ IАР** *и. диал. ҡар.* **күтәрем** 2.

**ЯҪМЫҠ** *и.* **1.** Яҫы түңәрәк орлоҡло ҡуҙаҡлы үҫемлек. *Яҫмыҡ сәсеү.*

**2.** Шул үҫемлектең орлоғо. *Яҫмыҡ өйрәһе.*

**ЯҪТАНЫУ** *к.* Ятыуға уңайлы булһын өсөн баш аҫтына нимәлер һалыу. *Мендәр яҫтаныу. Яҫтанып ятыу.* ■ *[Мөлөк] сәкмәнен түшәп, ҡамыт-ыңғырсағын яҫтанып, салҡан төшөп йоҡоға ятты.* Т. Хәйбуллин.

**ЯҪТАР** *и.* Баш аҫтына яҫтаған нәмә.

**ЯҪТАУ** *к.* Ятыуға уңайлы булһын өсөн баш аҫтына нимәлер һалыу. *Мендәр яҫтау. Тун яҫтау. Яҫтап ятыу.* ■ *[Төлкө:] Айыу дуҫ,.. бөгөн таш яҫтап йоҡлағайным, ҡолаҡтарым тонған* (Әкиәттән).

**ЯҪТЫҠ** *и.* **1.** Ҙур мендәр. *Мамыҡ яҫтыҡ. Яҫтыҡ яҫтау.* ■ *Ныязғол түрҙәге яҫтыҡҡа һыҙыла биреп, арҡа терәп, аяҡтарын һоноп ултырҙы.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Күсәр өҫтөнә һалып, үрәсә ултырта торған йыуан дүрткел ағас.

**3.** *диал. ҡар.* **һандыҡ** [2].

♦ **Сыҫҡан яҫтығы** быуынлы-быуынлы итләс аҡһыл япраҡлы тау үләне. **Яҫтыҡҡа баҫтырыу** туй йолаһы буйынса, ҡәйнә йортона төшкән килендең аяҡ аҫтына, «төклө аяғың менән кил!» тигән теләк менән яҫтыҡ һалыу.

**ЯҪЫ** *с.* Арҡырыһы, иңе ҙур; киң. *Яҫы таҡта. Яҫы маңлай. Яҫы ҡаш.* ■ *Яҫы таш өҫтөндә һыу ҡыҙы алтын тараҡ менән .. сәсен тарап ултыра.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». *Яҫы ғына яурын, киң күкрәкле [Шаһибәрәк] Бикҡол ауылының егете* (Халыҡ йырынан).

♦ **Яҫы табан** *ҡар.* **табан** [1] 1.

**ЯҪЫҠ** *с. ҡар.* **яҫы.**

**ЯҪЫЛАНЫУ** *к. ҡар.* **яҫырыу.**

**ЯҪЫЛЫҠ** *и.* Ниҙеңдер тигеҙ, яҫы йөҙө; яҫы майҙан. *Горизонталь яҫылыҡ. Экватор яҫылығы.*

**ЯҪЫРЫУ** *к.* Яҫыға әйләнеү, киңәйеү. *Атлаған һайын юл яҫыра, күк киңәйә бара.* Й. Солтанов.

**ЯҪЫУ: ҡул яҫыуы** ҡулдың ус тәңгәлендәге киңлеге. *Ғәбитовтың .. муйыны елкә тирәһенәрәк ҡул яҫыуындай һыҙырылған.* А. Таһиров. *Утыҙ ҡабат барҙыҡ атаҡаға ҡул яҫыуы тиклем ер өсөн.* Х. Ғиләжев.

**ЯТ** *с.* **1.** Интәшлек-кәрҙәшлек мөнәсәбәте менән бәйләнмәгән; сит. *Ят кеше.* ■ *Ир башкайҙарына нужа төшһә, якшы дуҫтар йөрөмәҫ ят итеп* (Халыҡ йырынан). **Ете ят** 1) етенсе быуын балалар (бер-береһенә ҡарата). *Борондан килгән заң буйынса, кәрҙәшлек ете быуынга тиклем генә иҫәпләнгән, унан һуң ул «ете ятка» әйләнә тип ҡаралган* (Әкиәттән); 2) туған түгел, бөтөнләй ят. *Яңы гына осрашкан ете ят кеше булһа ла, өндәшмәй барыу ҡыйын.* Ф. Иҫәнғолов; **Тыуа ят** *ҡар.* тыуа [1]. **Ят бауыр** *ҡар.* **бауыр.**

**2.** Тыуған йәки торған ерең булмаған; таныш түгел; сит. *Ят ер. Ят ҡала.* ■ *Ят яктар, күҙ өйрәнмәгән юлдар. Аҙым һайын тиерлек яңы донъя асыла.* Р. Низамов. / Әлегәсә билдәһеҙ булған; сит. *Ят йыр. Ят тауыш.* ■ *Был күлдә кешеләр ҙур, ят һәм имәнес януар күрәләр.* Д. Бураҡаев.

● *Илашырга үҙ якшы, һыйлашырга ят якшы.* Мәҡәл.

**ЯТАҒАН** *и.* Өйҙән сыҡмай ултырырға яратҡан кеше.

● *Ятаган сыкһа, яу булыр.* Әйтем.

**ЯТАҠ** [1] *и* **1.** Бергә эшләгән, уҡыған кешеләр тора торған дөйөм торлаҡ. *Егеттәр ятагы. Ҡыҙҙар ятагы. Буйҙаҡтар ятагы. Институт ятагы. Ятакта тороу.* ■ *Ятакта эштән ҡайтҡан ҡыҙҙар шау-гөр килеп тора.* З. Биишева.

**2.** Йоҡо урыны. *Ятак булмаһе.* ■ *[Сурагол] үҙенең ятагы булган баягы өйгә инде.* Т. Хәйбуллин.

**3.** Кейек-йәнлектең ятып йөрөгән ере, төйәге. *Бүре ятагы.*

♦ **Ятаҡ тарыу** ятҡы килеп тороу, ятаҡлау.

**ЯТАҠ** [2] *и. иҫк.* Байҙа ятып эшләгән ҡара эшсе; ялсы. *Ятак булыу.*

**ЯТАҠЛАУ** *к.* **1.** Ятаҡ итеп урынлашыу; төйәкләү. *Мал йылга тамагында ятаклаган.*

**2.** Гел ятырға ғына ыңғайлау. *Йылкы малы ауырыкһынып, ятаклап торһа, уга сысҡансыҡ була.*

**ЯТАҠХАНА** *и. ҡар.* **ятаҡ** [1] 1.

**ЯТАП** *и. һөйл.* Этап.

**ЯТА-ТОРА** *р.* **1.** Бер ятып, бер тороп. *Ята-тора йөрөү.*

**2.** Әкренләп, айлап. *Баш һау булһа, мал табыла. Ҡабаланырга ярамай, ята-тора бөтәһе лә табылыр.* М. Тажи.

**ЯТ-ЙОЛАМА** *и. йыйн.* Төрлө ят кеше. *[Ҡаҙиса:] Ят-йолама алдында нисек йөҙөн асмак кәрәк?* В. Нафиков.

**ЯТҠА** *р.* Иҫтә ҡалғанса, күңелдән; яттан. *Шигырҙы ятка һөйләү. Ятка белеү.*

**ЯТҠЫ: бала ятҡыһы** *анат.* Һуңғылыҡ.

**ЯТҠЫҘЫУ** *к. диал.* Ятҡырыу.

**ЯТҠЫЛЫҠ** *и.* Файҙалы ҡаҙылдыҡ булған урын. *Алтын яткылыгы. Нефть яткылыгы. Күмер яткылыгы.*

**ЯТҠЫН** *и. диал. ҡар.* **ятыу** [2].

**ЯТҠЫРМА: ятҡырма ситән** *диал.* текмә.

**ЯТҠЫРЫУ** *к. ҡар.* **ятыу** [1].

**ЯТЛАЙ** *р. ҡар.* **ятҡа.** *Ятлай һөйләү.*

**ЯТЛАЙҒА** *р.* Үҙе юкта, үҙе булмағанда, артында. *Йомай .. Заһитты ятлайга орошоп ташланы.* Һ. Дәүләтшина.

**ЯТЛАТЫУ** *к. йөкм. ҡар.* **ятлау.**

**ЯТЛАУ** *к.* Хәтерҙә ҡалдырыу өсөн ниҙелер ҡат-ҡат ҡабатлау. *Шигыр ятлау. Ятлап алыу.* ■ *Ул айырылышкан сакта йырлармын тип, йырҙар ятланы.* Ғ. Сәләм.

**ЯТМА** *и. иҫк.* Киске уйын, аулаҡ өйгә йыйылып ҡуныу кисәһе. *Ятмага барыу.*

**ЯТМАҠ** *и. диал. ҡар.* күтәрем 2.

**ЯТТАН** *р.* Иҫтә ҡалғанса, күңелдән; ятҡа. *Яттан иҫәпләү. Яттан ҡабатлау. Шигырҙы яттан белеү. Яттан һөйләү.* ■ *Яттан укып һинең шигырыңды яндарыңда оҙак ҡаламын.* Ғ. Дәүләтов.

**ЯТҺЫНЫУ** *к.* Ят күреү, ятҡа һанау; ят итеү. *Ятһынып йөрөү. Ятһынып ҡарау. Бала ятһынып тора.* ■ *Һәр кем әйтер һүҙен әйтә, йырлар йырын йырлай, ятһынып тормай.* М. Кәрим.

**ЯТҺЫРАТЫУ** *к.* Үҙ итмәй, ситләтеү. *Кешене ятһыратыу.*

**ЯТҺЫРАУ** *к.* Ят күреп, ситләшеү. *Һуңгы көндәрҙә кешеләрҙән айырым йәшәп ятһыраган Әбүзәрҙең күңеле күтәрелде.* Я. Хамматов.

**ЯТҺЫТЫУ** *к.* Үҙ итмәй, яҡын күрмәй, ситләтеү. *Ятһытып ҡакһаң да ситкә, мин киләм, мин үҙһенәм.* Д. Юлтый.

**ЯТЫҠ** *и.* **1.** Урманда ауып, ҡороп ятҡан ағастар.

**2.** Утын һалып ҡырҡа торған ағас; түмәр. *Ятыкта утын ҡырҡыу.*

♦ **Көрәгәгә ятыҡ һалыу** *этн.* боронғо йола буйынса ҡунаҡтарға ҡайтыр ваҡыт етте, тигәнде аңлатып, көрәгәгә ағас киҫәге, киҫкә һалыу.

**ЯТЫЛЫУ** *к. эйһ. ф. ҡар.* **ятыу** [1]. *Ҡар өҫтөндә оҙак ятылды.* А. Карнай.

**ЯТЫМЛЫ** *с. ҡар.* **ятышлы.** *Ҡолакка ятымлы һүҙ.*

**ЯТЫНДЫҠ** *и. диал.* Утынлыҡ.

**ЯТЫР** *с.* **1.** Ҡышҡа ҡала торған, ятырға тейешле. *Ятыр ҡар.* ■ *Ятыр ҡар яуғас ук, улар [айыуҙар] .. йоҡларга ята.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Йоҡларға ята торған, йоҡларға тейешле. *Ятыр сак. Ятыр ваҡыт етте.* // Ятырҙа өйгә ҡайт. ■ *Ятырҙа урам буйлап йырлашып йөрөнөләр.* Ж. Кейекбаев.

**ЯТЫРҠАУ** *к. диал.* Ятһыныу.

**ЯТЫУ** [1] *к.* **1.** Тотош кәүҙә менән горизонталь хәлдә урынлашыу. *Ергә ятыу. Ҡырын ятыу. Ятып алыу. Ятып тороу. Салкан ятыу.* ■ *Моронон ҡарга тыгып, күҙен безрәйтеп, бер эт шыңшып ята, ти* (Әкиәттән). / Йоҡлар өсөн урынлашыу. *Иртә ятыу. Һуң ятыу.* ■ *Ҡарттар көндөҙгө эште бөтөрөп, ятырга әҙерләнгән. Хәҙер иртә ятмаһаң, аҙгы ҡыҫҡа төндә йоҡо туймай.* Ғ. Дәүләтшин. / Ауырып, түшәктә булыу. *Оҙак ятыу. Больницала ятыу.*

**2.** Һалған, урынлаштырған хәлдә булыу. *Аҫҡыс өҫтәлдә ята. Бесән ҡырҙа ята. Кейем һандыкта ята.* / Өҫтән ҡаплап, урынлашҡан хәлдә булыу. *Ҡыҙҙың элекке ҡояш кеүек якты йөҙөнә ни эшләптер шәүлә ятҡан.* Ә. Вахитов.

**3.** Ғәҙәттәге булмышта, ғәмәлдә булыу. *Инде әҙәм аягынан тапалмай, тыныс ятҡан ерҙәр актарыла.* Т. Хәйбуллин.

**4.** Ғәҙәттәге тормошта йөрөү, йәшәү. *Өйҙә ятыу. Буш ятыу. Шәп ятаһыңмы?* ■ *Аҙна үткәс,*

*бай янына килеп Оморҙаҡ: «Тик ятыу бик екһетте бит әле .. Бер төрлө эш булмаҫмы?» — тип һораған* (Әкиәттән). / Ниндәйҙер урында йәки эштә булыу. *Ауылда ятыу. Ҡунаҡта ятыу. Ятаҡта ятыу. Бесәндә ятыу.* ■ *Колхоздың бесәнселәре алты урында ҡуна ятып эшләй.* Р. Бикбаев.

**4.** *күсм.* Ыҡсым, килешле булыу. *Төхвәт аҡ яғалы күлдәк өҫтөнән яҡшы костюм кейгән, костюмы кәүҙәһенә ятып тора.* Ғ. Хәйри. / Килешеү, оҡшау. *Сәсе оҙон,.. һаҡал-мыйыҡтары бер ҙә йөҙөнә ятып бөтмәй.* Д. Юлтый.

**5.** *-а, -п* формаһындағы хәл ҡылымға ҡушылып, төп ҡылымға дауамлы хәҙерге заман төшөнсәһе биргән ҡушма ҡылым яһай. *Бара ятыу. Килә ятыу. Ағып ятыу. Йөрөп ятыу.* ■ *Бер ваҡыт кинйә малай ҡул буйында йөрөп ятһа, һыу ситендә ултырған бер ҡыҙға тап була* (Әкиәттән).

**6.** *-ырға* формаһындағы ҡылымға ҡушылып, киләсәк эш-хәрәкәтте белдергән ҡушма ҡылым яһай. *Барырға ятыу. Килергә ята. Ҡайтырға ятыу. Үлергә ятыу.*

◆ **Күңел[гә] ятыу** оҡшау, яратыу, хуш күреү. *[Таңсулпан] йәшлек мөхәббәтенә мәңгегә тоғро булып ҡалды. Башҡаларға күңеле ятманы.* Ф. Рәхимғолова. *Йырым күңелдәргә ятһын, йырым минең тынмай аҡһын.* Р. Ғарипов. **Ят та үл** ғәжәп итерлек, хайран ҡалырлыҡ бер нәмәгә ҡарата әйтелә. *Көтмәгәндә шундай ҡыҙҙар осрай, шундай ҡыҙҙар — ят та үл инде!* Р. Ғарипов. **Ятһа ла, торһа ла** һәр ваҡыт. *[Ҡунаҡкол ҡатыны:] Өйҙәш һине яҡын итә, Маһира. Ятһа ла, торһа ла телендә — һин.* Х. Ғиләжев. **Ятып ҡалыу** 1) бушҡа сығыу, онотолоу; 2) хәстәрен, сараһын күрмәй, тик йөрөү.

● *Егетлек ерҙә ятмаҫ.* Мәҡәл. *Ятып ҡалғанса, атып ҡал.* Әйтем.

**ЯТЫУ** [2] *и.* Йылғаның әкрен, яй аҡҡан тәрән урыны. *Йылға ятыуы.* ■ *Беҙҙең Иҙәш буйы — әй, күк ятыу, күк ятыуҡайҙарҙа күк бәрҙе* (Халыҡ йырынан).

◆ **Мал ятыуы** *кар.* **саңлау** [3].

**ЯТЫУЛАУ** *ҡ.* Гел ятырға ғына ыңғайлау; ятаҡлау.

**ЯТЫУЛЫ** *с. диал.* Тәрән ятыуы булған. *Ятыулы йылға.* ■ *Яманға ҡаршы тулҡынған, яҡшыға ҡарап урғылған, диңгеҙҙән дә ятыулы, Уралдан да артыулы — нимә булыр, әйт шуны* (Ҡобайырҙан).

**ЯТЫШ** [1] *и.* **1.** Ятыу, урынлашыу рәүеше. *Нәмәнең ятышы.* ■ *[Әбүзәр:] Яҡтыла тамаҡ ялғап алмайыҡмы? Ҡайыш ятышы бушаны.* Я. Хамматов.

**2.** *кар.* **ятҡылыҡ**. *Алтын ятышы.* ■ *Газ күп булмаған ятыштарҙа иһә иң өҫтә нефть, ә уның аҫтында һыу була.* Д. Бураҡаев.

**ЯТЫШ** [2] *с. кар.* **ятышлы.**

**ЯТЫШЛЫ** *с.* Килешле, ярашлы. *Йөрәккә ятышлы йыр. Телгә ятышлы исем. Телгә ятышлы һүҙ.*

**ЯТЫШЫУ** *ҡ. урт. кар.* **ятыу** [1] 1. *[Ике һыбай] килеп еткән саҡта ауылда күптән ятышҡандар ине инде.* Б. Бикбай.

**ЯТ-ЯМАН** *и. йыйн.* Сит, дошман кешеләр. *Тарих юлсыһы яҡшы дуҫҡа йәнен йәлләмәгән, ят-яманға булған аяуһыҙ.* С. Кулибай.

**ЯУ** *и.* **1.** Берәр ил, дәүләткә ҡаршы ойошторолған һуғыш хәрәкәте. *Сынғыҙ хан яуы. Дошман яуы. Яу сабыу. Яу ҡайтарыу.* ■ *Ҡаныгып килгән яуҙарҙан йортон-ерен һаҡларлыҡ ир етте инде Уралда* (Ҡобайырҙан). *Яуға ҡаршы яу сабыр батыр-батыр ирҙәр бар* (Ҡобайырҙан).

**2.** Ғәскәр менән ғәскәр араһындағы ҡораллы алыш; һуғыш. *Изге яу. Яу аты. Яу ҡоралы. Яу ораны. Яу ҡыры. Яу асыу. Яуға барыу. Яуҙан ҡайтыу.* ■ *Яҡшы атаның балаһы шәһит үлә яу йөрөп.* Салауат Юлаев. / Бойондороҡло халыҡтың азатлыҡ өсөн аҫҡан ҡораллы көрәше. *Салауат яуы.* ■ *18 быуаттың тәүге яртыларында башҡорт илендә Ҡараһаҡал, Аҡай яуҙары була.* М. Буранғолов.

**3.** Ҡораллы ғәскәр. *Яу башы.* ■ *Француз, француз килә, ти, Наполеоны түрә ти, яуы еткән Мәскәүгә лә буҫағала тора, ти* (Халыҡ йырынан). *Батшаның яуы шунда уҡ ҡырылып бөтә. Һуғыш туҡтай* (Әкиәттән). / Ғәскәрҙәге ҡораллы кеше; яугир, һалдат. *Сиреү хеҙмәтенә яу алыу.* ■ *Иртуған үҙенең егерме яуы менән һалдаттарға ҡаршы .. һуғыша ине.* А. Таһиров. *Ул [Сәрмәсән] йырсы ла, ҡурҡыу белмәҫ яу ҙа булды.* «Һуңғы һартай».

**4.** Яман кеше, дошман. *[Тимерғотло — ханға:] Халҡың менән үҙең аман йөрөң, теләһәң яу, теләһәң дуҫ бул үҙең.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**5.** *күсм.* Ниҙелер күпләп бөтөрөүсе, нимәнелер күп тотоноусы. *Аҡса яуы. Икмәккә яу. Утынға яу.* ■ *Урак еткәс, иртә-кис тә орлоҡҡа яу ул ҡарға.* С. Кулибай.

◆ **Күҙ(ҙең) яуын алыу** матурлығы, баҙыҡ төҫө менән күҙҙе сағылдырыу. *Күҙҙәрҙең яуын алып, ал сәскәле гөл үҫте.* А. Игебаев. **Ҡара яу** күмәк, көслө ҙур ғәскәр. *Ауыл һайын йөрөп кешеләрҙе ҡырған ҡара яу Мырҙағолдо таба алмаған* (Хикәйәттән). **[Ҡара] яу булыу** ябырылып, иҫәпһеҙ күмәк төркөм булыу. *Яу булып килеү.* ■ *Айбарланған батырҙар яуға барыр яу булып* (Ҡобайырҙан). *[Бабай:] Ҡоро ҡул менән алып булмай. Бөтә ҡоралдарығыҙҙы алып, илегеҙ менән яу булып килегеҙ тигән* (Әкиәттән). **Яу һалыу** *шул уҡ* **яр һалыу** (*кар.* **яр** [2]).

● *Яу серен яу белмәҫ.* Мәҡәл. *Үҙеңдеке үҙеңә яу.* Әйтем. *Ут менән һыу телһеҙ яу.* Әйтем. *Яу ҡайтһа батыр күп.* Әйтем.

**ЯУАП** [*ғәр.*] *и.* **1.** Һорауға, мөрәжәғәткә ҡайтарып әйтелгән һүҙ. *Яуап ҡайтарыу.* ■ *Егет әйткән: «Тәүҙә һин миңә исемеңде әйт, һылыу ҡыҙ»,— тигән. Ҡыҙ яуап биргән: «Минең исемем Барсын булыр»,— тигән.* «Алпамыша». / Уҡытыусының дәрес буйынса ҡуйған һорауына ҡайтарып һөйләгән һүҙ. *Дөрөҫ яуап. Яуап биреү.*

**2.** Йомаҡтың, математик миҫалдың йәки мәсьәләнең сиселгән һөҙөмтәһе. *Йомаҡтың яуабы. Мәсьәләнең яуабы. Яуабын табыу.* ■ *Өлкөм-өлкөм төрөлөп, матур булып күренеп, үҫә күҙҙе ҡыҙҙырып, ҡыҙыл булып бөрөлөп. Йә, һин уйлап тап әле, нимә булыр яуабы.* Ғ. Амантай.

**3.** Кемдеңдер берәр эшенә, ҡылығына йәки бер нәмәгә мөнәсәбәт белдереп, ҡаршы эшләнгән эш. *Яуап ҡағыҙы. Яуап хаты.* ■ *Уларҙың [ҡыҙҙарҙың] матур яҙылған хаттарына ҡаршы матур яуап яҙырға кәрәк.* Д. Юлтый.

4. Үҙ эшең, ҡылығың өсөн үтәргә тейешле бурыс.

♦ **Яуап алыу** нимәнелер асыҡлау, дәлилләү өсөн шаһиттарҙан йәки ғәйепләнән һорашып кәрәкле мәғлүмәт алыу. *«Ҡаракөлөмбәт кайҙа, әйтеп бир!» — тип, Күсәк батыр был үҫмерҙән яуап алды.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *Ҡаһым түрә яуап алған сакта дошман майор тора ҡалтырап* (Халыҡ йырынан). **Яуап биреү** 1) ғәйепле кеше йәки шаһит булып, ниҙер тураһында мәғлүмәт биреү. *Ике лә генә башҡорт яуап бирә .. Циолковский түрә алдында* (Халыҡ йырынан); 2) ниндәйҙер эштең, ҡылыҡтың һөҙөмтәһе өсөн бурыслы булыу. *[Доктор:] Кеше яҙмышы өсөн мин яуап бирәм!* Б. Бикбай; 3) нимәнеңдер талабына ярашлы булыу. **Яуапҡа тарттырыу** ғәйепләп, хөкөм итеү; хөкөмгә тарттырыу. *[Атаһы — Хисамға:] Улым,.. был нәмә менән шаярырға ярамай. Был патронды беҙҙә тапһалар,.. яуапҡа тарттырырҙар.* Ш. Насыров.

● *Дөрөҫ һүҙгә яуап юк.* Әйтем. *Тауҙай талабың булғанса, тырнаҡтай яуабың булһын.* Әйтем.

**ЯУАПҠАРЛЫҠ** *и. иҫк.* Яуаплылыҡ.

**ЯУАПЛАМА** [*ғәр.* + *фарс.*] *и. дини* Үлгән кешенең бер ҡат уралған кәфене өҫтөнән түшенә һалына торған доға яҙылған ҡағыҙ (имеш, кеше теге донъяла шул ҡағыҙға ҡарап яуап бирә). *Яуаплама яҙып һалыу.* ■ *Яуаплама ҡырҡ бүлек, ҡырҡ бүлектә ҡырҡ яуап яҙыла* (Хикәйәттән).

**ЯУАПЛАУ** *к.* Яуап ҡайтарыу, яуап биреү. *«Олатай, беҙҙең ошо йылғаның башы алыҫмы?» — тип һораған малай. «Өс көнлөк юл»,— тип яуаплаған аҡһаҡал.* Ә. Вахитов.

**ЯУАПЛАШЫУ** *к.* Риза булмай, ҡаршы һөйләшеү; һүҙ көрәштереү. *Новиков менән яуаплаша башлаһаң, ул һинең бер һүҙеңә ун төрлө һүҙ әҙерләй.* Д. Юлтый.

**ЯУАПЛЫ** *с.* 1. Ниҙеңдер булмышы, үтәлеше өсөн яуап тоторға тейешле, бурыслы. *Яуаплы кеше.* ■ *Үксәң тейеп үткән тупраҡҡа һин яуаплы Ватан алдында.* С. Кулибай. / Эш өсөн айырым хоҡуҡлы һәм бурыслы. *Яуаплы редактор. Яуаплы секретарь.*

2. Бик әһәмиәтле. *Яуаплы осор. Яуаплы эш.* ■ *Колхоз өсөн иң яуаплы эш — ашлыҡ йыйыу эше.* Ш. Насыров. *Бөгөнгө көн ауыр, яуаплы, бик күп эштәр өҫкә йөкмәгән.* Ғ. Амантай.

**ЯУАПЛЫЛЫҠ** *и.* 1. Ниҙеңдер булмышы, үтәлеше өсөн яуап тотоу бурысы. *Ҙур яуаплылыҡ. Яуаплылыҡты күтәреү. Яуаплылыҡты тапшырыу.* / Үҙ эшең, ҡылығың өсөн яуап тотоу бурысы. *Яуаплылыҡҡа тарттырыу.*

2. Хөкөм ителгән кешенең артабанғы эше, тәртибе өсөн белдерелгән ышаныс. *Яуаплылыҡҡа алыу. Яуаплылыҡҡа тапшырыу. Яуаплылыҡҡа биреү.*

**ЯУАПСЫ** *и.* Ғәйепләнеп судҡа тарттырылған кеше.

**ЯУАПҺЫҘ** *с.* 1. Эшенә, ҡылығына һ. б. яуаплылыҡ тоймаған, еңел мөнәсәбәтле. *Эш аттарына былдай яуапһыҙ, хатта енәйәтсел ҡарауҙы ҡырҡа бөтөрөргә кәрәк.* М. Тажи.

2. Әһәмиәте бәләкәй. *Яуапһыҙ эш.*

**ЯУАПҺЫҘЛЫҠ** *и.* Яуаплы тип ҡарамаған еңел мөнәсәбәт.

**ЯУГИР** [*фарс.*] *и.* Яуҙа, һуғышта ҡатнашҡан кеше; һуғышсы. *Яугир булыу. // Яугир ир.* ■ *Алға баҫа яугир олатайҙар .. Улар илен тиккә һөймәгән, илем тиеп тиккә көймәгән!* Р. Ғарипов. *Яугир ирҙәребеҙ нисә заман аҡ тирмәлә ҡылыс ҡайраған.* Ш. Бабич.

**ЯУГИРЛЕК** *и.* Һуғышсанлыҡ, яуҙа күрһәтелгән батырлыҡ. *Яугирлек күрһәтеү.* ■ *Ағаларынан килгән яугирлекте 1735—1740 йылғы күтәрелештәрҙең бер уҙаманы булған Юлай Аҙналиндың эшен улы Салауат Юлаев күтәреп ала.* И. Акманов.

**ЯУҘАШ** *и.* Яуҙа бергә ҡатнашҡан, бергә һуғышҡан кеше. *Яуҙаш булыу.* ■ *Беренсе Дәүләтҡол ауылынан килгән хат был. Үҙенең яуҙаш дуҫтарының береһе менән таныштыра пенсионер Хәлит Бикколов иптәш.* Р. Шәкүр. *Яуҙа — яуҙаш, дандаш һәм кәберҙәш изге һуғыш үткән майҙанда.* М. Кәрим.

**ЯУҘЫҠ** *и. диал.* Яулыҡ. *Яуҙыҡ бөркәнеү.*

**ЯУҘЫРЫУ** *к.* 1. Яуырға мөмкинлек биреү. *Ямғыр яуҙырыу.* / *күсм.* Бер-бер артлы күпләп осороу. *Пуля яуҙырыу.* ■ *Самолёттар бомба яуҙырҙылар, урамдарҙа туптар ярылды.* Р. Ниғмәти.

2. Бер-бер артлы күпләп ебәреү. *Рәхмәт яуҙырыу. Хат яуҙырыу.* ■ *[Ишан] мәҙрәсәне яптыра, төрлө доностар яуҙыра.* Ш. Бабич.

**ЯУЛАНЫУ** *к. төш. кар.* **яулау.** *Яуланған уңыш.*

**ЯУЛАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **яулау.**

**ЯУЛАУ** *к.* 1. Яу менән сығыу, яу сабыу. *Еңеү яулау.* ■ *Уғы менән таш һындырған, илен яулап яу сапҡан ил дошманын ҡыйраткан батырҙар килә, ау, кем!* (Ҡобайырҙан). *Хас дошмандар яулап нишләр тиһең, ир-егеттәр башы һау булһа* (Халыҡ йырынан).

2. Ниҙелер бар итеү, булдырыу өсөн көрәшеү. *Азатлыҡ яулау. Беренселекте яулау. Бәхет яулау. Ирек яулау. Уңыш яулау. Чемпион исемен яулау. Яулап алыу.* ■ *Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып, шул теләкте яулайыҡ, шул иректе яулайыҡ.* Салауат Юлаев.

3. *күсм.* Ниндәйҙер тойғо уятыу. *[Бабай:] Диңгеҙбикә, һиңә мәңгелек ғашиҡ инем. Инде һин минең мәңгелек нәфрәтемде яуланың.* З. Биишева. *Яр буйында кескәй тирмән көмөш һыу йырлап аға, үткән-сүткән юлсының күңелен яулап ала.* Ш. Галин.

**ЯУЛАШЫУ** *к.* 1. *урт. ярҙамл. кар.* **яулау.** *Һин даулаштың, һин яулаштың, сәнгәт, ерҙең тәүге азат сәғәтен.* Р. Ғарипов.

2. Ниҙер өсөн көрәшеү, даулашыу, еңешеү. *[Ҡотлояр:] Һин юкты һөйләмә, Сәғди! .. Ятып үлеү ир-егеттең һөнәре түгел ул. Хәлдән килгәнсә яулашырға кәрәк.* Һ. Дәүләтшина.

**ЯУЛЫҠ** *и.* Ҡатын-ҡыҙҙың дүрткел йоҡа туҡыма баш бәйләмесе. *Яулыҡ бәйләү. Яулыҡ ябыныу.* ■ *Яулыҡтарын ҡаплап бәйләп, бер осон ауыҙҙарына ҡабып,.. башҡорт бисәләре йөрөй.* Ғ. Дәүләтшин. **Француз яулыҡ** ҡыҙыл ерлеккә эре аҡ биҙәк төшкән яулыҡ.

♦ **Яулыҡ йәшереү** балалар, йәштәр уйыны

(түңәрәкләп ергә ултыралар; «көтөүсе» түңәрәкте әйләнеп йырлап йөрөй ҙә, һиҙҙермәй генә берәүҙең артына яулыҡ һалып китә; кеше һиҙеп ҡалһа, «көтөүсене баҫтырып, шул яулыҡ менән һуға; шунан һуң улар урын алмашалар).

**ЯУЛЫҠСАН** *р.* Яулыҡ ҡына ябынған көйө. *Яулыҡсан йөрөү.* ■ *Гөлзәгифә инәй яулыҡсан ғына үҙе үк беҙгә ҡарай ашығып килә ине.* Й. Солтанов.

**ЯУМ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Көн. *Атайыбыҙ хажи мулла Илсеғол .. донъянан үтте алтмыш биш йәшендә, рәжәп айында, Жәүзәнең алтынсы яумендә, тарихе һижрәттең 1200 йылында, ҡуй йылында.* «Башҡорт шәжәрәләре», 1960.

**ЯУМА** *и. ҡар.* **ямғыр.** *Яумаға әйләнеү.* ■ *Улар [Сәңкемдәр] хаҡында ғына, яума булһа — Нөгөш ташыр, ғауға сыкһа — сәңкем ҡасыр тиҙәр.* Ғ. Ибраһимов.

**ЯУМАЛАУ** *ҡ. диал.* Яуынлау. *Яумалап китеү. Яумалап тороу.*

**ЯУРЫН** *и.* Тәндең ҡулбаштан елкәгә ҡәҙәрге урыны; иңбаш. *Киң яурынлы. Тар яурынлы. Яурын башы. Яурын һөйәге. Яурынға һалыу.* ■ *Сапсан ҡош .. Заятүләктең яурынына килеп ҡуна.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». *Салауат батыр ир ине .. яурынына ук тейһә — себен тешләй, тир ине* (Ҡобайырҙан). / Кейемдең шул урынға тура килгән өлөшө; иңбаш. *Күлдәктең яурыны. Бишмәттең яурыны. Күлдәгенең яурыны тар.*

◆ **Ҡуҙы яурын башаҡ** дүрт ҡырлы осло башаҡ. *[Ҡарас батыр:] .. Ҡуҙы яурын ҡорос башаҡ бәлдәгәндә майшайт ҡырын тейһәң, һиңә намыҫ* (Ҡобайырҙан).

**ЯУРЫНБАШ** *и.* Яурындың ҡул килеп тоташҡан ике башы; ҡулбаш.

**ЯУРЫНЛАУ** *ҡ.* Яурынға һалыу, йөкмәү. *Яурынлап алып китеү.*

**ЯУРЫНЛЫ** *с.* Киң яурынлы; яурынтаҡ. *Яурынлы кеше.*

**ЯУРЫНСА** *и.* Ҡатын-ҡыҙ еләненең яурынына ҡуйыла торған суҡлы уҡа. *Яурынса яһау.* ■ *Донъя тыныс саҡта [Кейекбай] ҡыҙ-ҡатындарға .. беләҙек, балдаҡ, ҡаптырма, сулпы, бөйөрсә, яурынса һәм сәсмәүҙәр ҙә яһаған.* «Бикйән Мәргән».

**ЯУРЫНСАЛАУ** *ҡ.* Яурынса ҡуйыу. *Еләнде яурынсалап тегеү.*

**ЯУРЫНТАҠ** *с.* Киң яурынлы. *Яурынтаҡ егет.* ■ *Халыҡ төркөмөн аралап .. оҙон аҡ тун кейгән яурынтаҡ ҡарт алға сыҡты.* Ә. Ихсан.

**ЯУРЫНТАҪ** *с. диал.* Яурынтаҡ. *Һайлап алған кеүек яурынтаҫ осоусылар стройға теҙелде.* Б. Бикбай.

**ЯУРЫНТЫҠ** *с. диал.* Яурынтаҡ. *1942 йылдың 26 ғинуарында беҙҙең полктың даими командиры Таһир Кусимов килде. Оҙон буйлы, яурынтыҡ бәһлеүән кәүҙәле егет.* С. Әлибаев.

**ЯУСАН** *с.* Батыр яу сапҡан; һуғышсан. *Салауат ҡандай бәһлеүән? Даусан, яусан бәһлеүән, еңелмәүсән бәһлеүән.* Ш. Бабич.

**ЯУСЫ** [1] *и.* Боронғо туй йолаһы буйынса, егеткә кәләш әйттереү өсөн ҡыҙ һоратып, ҡоҙалап барған кеше. *Яусы булып барыу. Яусы ебәреү. Яусы булыу.* ■ *Был йәш батша күрше батшаның ҡыҙына әллә нисә тапҡыр яусы ебәреп ҡараһа ла, ҡыҙ риза булмаған, ти* (Әкиәттән).

● *Яҡшы атҡа ҡамсы, уңған ҡыҙға яусы кәрәкмәй.* Мәҡәл.

**ЯУСЫ** [2] *и. ҡар.* **яугир.** *[Таңдыса:] Был ерҙә Урал батырҙың яусылары ҡойма яуында ышыҡланған булыр.* «Ҡуңыр боға».

**ЯУСЫЛ** *с.* Яу сабырға батыр, яу сабыуға оҫта. *Яусыл халыҡ.* ■ *Борон-борондан батшаға баш әймәҫ, яусыл тоҡом булған беҙҙең сөмкәләр.* Б. Бикбай. *Яусыл булған атама ата булған Уралым; йүнсел булған әсәмә әсә булған Уралым* (Ҡобайырҙан).

**ЯУСЫЛАТЫУ** *ҡ.* Яусы ебәреү; яусылау. *Ҡапҡан һалдым ҡараташҡа, күк бүрене алам, тип, яусылаттым ҡоҙасаны, бисәлеккә алам, тип* (Халыҡ йырынан).

**ЯУСЫЛАУ** *ҡ.* Яусы [1] ебәреү йәки яусы булып һоратыу. *Яусылап йөрөү.* ■ *[Үмәр:] Бына, хәҙрәт, беҙҙең ҡыҙыбыҙ үҫте, төрлө яҡтан яусылай башланылар.* Һ. Дәүләтшина.

**ЯУЪЯЛЛАШЫУ** *ҡ.* Еңәм тигән маҡсат тотоп, ныҡ һуғышыу, ҡанға-ҡан килеп талашыу. *Бөтә көн күрешен яуға ҡарап йәйлаған, яуъяллашып күнеккән, күпмелер ерҙәрҙе баҫып алған, күпме халыҡтарҙы үҙенә буйһондорған был оло яуҙы башҡорттарға үҙалдына ғына кире ҡағыу һис мөмкин булмаған.* Ғ. Хөсәйенов.

**ЯУЫЗ** *с.* Кешегә насарлыҡ, яманлыҡ ҡылыусан; уҫал. *Яуыз кеше.* ■ *Атҡа менегеҙ, ирҙәр, ағалар, асылһын әйҙә яралар! Яраларҙы ирек уңалтыр, яуыз дошман башын юғалтыр!* Салауат Юлаев. / Насарлыҡ, яманлыҡҡа ҡоролған. *Яуыз эш.* ■ *Яуыз ниәт менән һалһаң ҡапҡаңды, көт тә тор һин үҙең ҡапҡанды.* Н. Иҙелбай. **Эт яуызы** бик яуыз. *Эт яуызы кеше. Эт яуызы булыу.*

**ЯУЫЗДАРСА** *р.* Яуыз рәүештә; вәхшиҙәрсә. *Ҡаракөлөмбәт яуыздарса атты шулай, Бабсаҡ батыр ҡыҙыл ҡанға батты шулай.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

● *Яуыз боҙоп ҡыуаныр, яҡшы төҙөп ҡыуаныр.* Мәҡәл.

**ЯУЫЗЛАНЫУ** *ҡ.* Яуызға әйләнеү, яуыз булыу. *Яуызланып китеү.*

**ЯУЫЗЛЫҠ** *и.* Яуыз сифат; этлек. *Кешенең яуызлығы.* / Яуыз эш, ҡылыҡ. *Яуызлыҡ ҡылыу.* ■ *Яуыздарҙың яуызлығы арҡаһында ҡайһы берәүҙәрҙең тормошо селпәрәмә килә.* И. Ғиззәтуллин.

● *Ит изгелек, көт яуызлыҡ.* Әйтем.

**ЯУЫҠ** *с. иҫк.* Яҡын.

● *Алыҫ менән яуыҡты юрҡан белер.* Мәҡәл. *Тикмә кеше үҙ булмаҫ, ят яуыҡ булмаҫ.* Мәҡәл.

**ЯУЫМ** *и.* **1.** Ҡар, ямғыр һ. б. атмосфера күренештәре; яуым-төшөм.

**2.** *ҡар.* **ямғыр.**

**ЯУЫМЛЫ** *с.* Яуым-төшөм күп булған. *Яуымлы йыл.*

**ЯУЫМ-ТӨШӨМ** *и.* Ҡар, ямғыр, һ. б. атмосфера күренештәре; яуым. *Яуым-төшөм күп. Яуым-төшөм юҡ.* **Яуым-төшөм үлсәгес** ҡар-ямғырҙың миҡдарын үлсәй торған ҡорамал.

**ЯУЫН** *и. ҡар.* **ямғыр. Аҡ яуын** йылы йәйге көндә күк күкрәмәй, томан кеүек булып оҙаҡ

яуған ваҡ күҙле ямғыр. *Көн аҡ яуынға әйләнеп китте.* Т. Морат.

**ЯУЫНЛАУ** *к. кар.* **ямғырлау.** *Яуынлап алыу.* ■ *Көн яуынларға булһа, Шүркә тауы ыуылдап илай башлай. Түбәһендә һәр ваҡыт өйкөм-өйкөм болоттар уралышып йөрөй.* М. Тажи.

**ЯУЫНЛЫ** *с.* Ямғырлы. *Яуынлы йыл. Яуынлы булыу.* ■ *Көҙ көнө ҡар күп яуһа, яҙ яуынлы була, көҙ ҡар һуң булһа, яҙ яуынһыҙ була.* Һынамыш.

**ЯУЫН-СӘСЕМ** *и. иҫк.* Яуым-төшөм. *Шәрифә [ирен] таң беленер-беленмәҫтән малдар янына ҡыуҙы. Яуын-сәсемле саҡ, әллә нәмә булып тороуы бар.* Б. Бикбай.

**ЯУЫН-ТӨШӨМ** *и. кар.* **яуым-төшөм.**

**ЯУЫР** *и. диал.* Ыйыҡ.

**ЯУЫУ** *к.* **1.** Һауанан һибелеп төшөү (ҡар, ямғыр һ. б. күренешкә ҡарата). *Быҫҡаҡлап яуыу. Күк күкрәп яуыу. Ҡойоп яуыу. Һибәләп яуыу.* ■ *Ташлы тупраҡ нисектер туң һымаҡ ине. Етмәһә, дөгө ярмаһындай ваҡ ҡына борсаҡ яуа.* Ә. Вахитов. *Яуһын әле, яуһын ҡарҙар, тупрактар дымға туйыр.* А. Игебаев. **Саба яуыу** көслө ел, дауыл менән һибелеп һыҙырып яуыу. *Саба яуған ямғыр.* **Ултырып яуыу** тирә-яҡҡа таралмай, бер урында ғына оҙаҡ итеп яуыу. / *күсм. һөйл.* Бер-бер артлы күпләп осоу. *Бомба яуа.* ■ *Иртән торһам, пуля яуа шул ҡайғылы башыма* (Бәйеттән).

**2.** *күсм.* Бер-бер артлы күпләп килеү. *Хат яуа. Сәләм яуа. Рәхмәт яуа.* ■ *Таһиров урынына ултырырға өлгөрмәне, уға комсокомитет ағзаларынан һорау яуа башланы.* Н. Мусин.

**ЯФА** [*ғәр.*] *и.* Тәнде, йәнде ҡыйнаған ауыр кисереш; ғазап, ыҙа. *Яфаға ҡалыу.* ■ *Беҙ һуғышта йөрөгәндә ямғыр яуа, ҡалҡын ел. Шул ҡәҙәре яфаларҙа онотолмай туған ил* (Бәйеттән).

□ **Яфа күреү** (*йәки* **сигеү**) ыҙа, ғазап кисереү, яфаланыу. *Яфа күреп йәшәү.* ■ *Атай-әсәйҙәр беҙҙе ана шулай яфа сигеп үҫтереп кеше иткәндәр. Бала ата өсөн артыҡ түгел ул.* М. Тажи.

**ЯФАЛАНДЫРЫУ** *к.* Яфа менән йәшәтеү, ыҙа, ғазап, сиктереү.

**ЯФАЛАНЫУ** *к.* Яфа сигеү; ғазапланыу, ыҙаланыу. *Ауырып яфаланыу. Яфаланып йәшәү. Яфаланып ятыу.* ■ *Ҡотҡарырҙай булам наҙанлыҡтан яфаланган ярлы-ялпымды.* Т. Йәнәби.

**ЯФАЛАУ** *к.* Яфа сиктереү; ғазаплау, ыҙалау. *Ураҡ еттеме, әлеге ямғыр яфалай башлай .. Ҡара болоттар һағалап ҡына йөрөй.* Р. Низамов.

**ЯФАЛЫ** *с.* Яфа сиктергес, яфа күрһәткес; ыҙалы, ғазаплы. *Яфалы ауырыу.* ■ *Беҙ ҡалмайса артта кемдәр ҡалһын был яфалы тормош юлында.* Т. Йәнәби.

**ЯФАН** *с. кар.* **япан.** *Яфан ер. // Яфанға сығыу.*

**ЯФҠАҠ** *и. диал.* Ҡауырһын.

**ЯХТА** [*рус.* ‹ *гол.*] *и.* Спорт һәм сәйәхәт өсөн ҡулланылған мотор йәки пар арҙамында йөрөтөлгән елкәнле карап. *Яхтала йөрөү.*

**ЯХУД** [*фарс.*] *терк. иҫк. кит.* Йәки. *Көҙ ҙә, ҡыш та ат һимертеп, һунарға менеп сығып, һуға инеләр бүреләр, төлкөләр яхуд ҡуян.* С. Яҡшығолов.

**ЯҺАҠ** [1] *и.* Батша Рәсәйендә Волга буйы һәм Себер халыҡтарынан Рус дәүләте файҙаһына йыйылған һалым. *Яһаҡ түләү. Яһаҡ һалыу.* ■ *Башҡорттар ул ваҡыт ат егеп йөрөү һәм ҡышҡы юлдар булмағанлыҡтан яһаҡты ҡыш көнө саңғылар менән Ҡазан ҡалаһына илтеп тапшырырға тура килә ине.* Ғ. Фәхретдинов. *Билдәле булыуынса, 1754 йылдан һуң башҡорттар һәм мишәрҙәр [батшаға] рәсми рәүештә яһаҡ түләмәгәндәр.* Ә. Әсфәндиәров.

**ЯҺАҠ** [2] *и.* Атыр өсөн әҙерләп тултырылған дары менән дороп йәки йәҙрә. *Ҡуян яһағы. Яһаҡ яһау.* **Айыу яһағы** эре йәнлеккә ата торған ҡурғаш йәҙрә.

**ЯҺАҠЛАУ** *к.* Яһаҡ [2] ҡуйып, атырға әҙерләү; ҡороу, яһау. *Мылтыҡты яһаҡлау.*

**ЯҺАҠЛЫ** [1] *с.* Яһаҡ түләргә тейешле, яһаҡ һалыулы. *Яһаҡлы халыҡ. Яһаҡлы булыу.*

**ЯҺАҠЛЫ** [2] *с.* Яһаҡ ҡуйылған; ҡороулы. *Яһаҡлы мылтыҡ. Яһаҡлы булыу.*

**ЯҺАЛМА** *с.* **1.** Тәбиғи сифатына, ысын булмышына оҡшатып шуға яҡын итеп эшләнгән. *Яһалма ебәк. Яһалма йөн. Яһалма теш. Яһалма яҡут. // Малды яһалма рәүештә ҡасырыу.*

**2.** Ысын күңелдән булмаған, юрый. *Яһалма тауыш.* ■ *Әмирхановтың бөтә ҡыланышы көлкө, ялған һәм яһалма.* С. Агиш.

**ЯҺАЛМАЛЫЛЫҠ** *и.* Яһалмаға, ысын булмағанға ҡоролған нәмә. *Мөдир күҙен дә йоммай алданы, ләкин тыңлап тороусылар уның йөҙөнән саҡ ҡына шик килтерерлек тә яһалмалылыҡ эҙәрә тапманы.* Б. Бикбай. *Яһалмалылыҡ, ниндәйҙер ярты-йорто тойғолар менән йәшәү — шағир кешегә үлем менән бер ул.* Н. Нәжми.

**ЯҺАЛЫУ** *к. төш. кар.* **яһау** [1]. *Яһалған нәмә.*

**ЯҺАНЫУ** *к.* **1.** Ниҙер эшләргә ниәтләнеү; әҙерләнеү. *Булат инде көрәктәй ҡулын йоҙроҡлап, яһанып бөткәйне, ләкин дуҫының тыныс хәрәкәте һәм һүҙе уның ярһыуын баҫты.* Б. Бикбай. *Ҡарас батыр ҙа .. арҡаға сабып барып етә һалып, атышыуға яһана башлай: ат өҫтөндә янын ҡороп, ҡулына һаҙағын ал[а].* «Ҡарас менән Аҡша».

**2.** Өҫтө-башты биҙәү, матурлау; төҙәнеү. *Кисен мин уларҙы танцыла осраттым .. Көндөҙ ырҙында саңға буялып йөрөгән ҡыҙҙар тип уйламаҫһың да, кейенгәндәр, яһангандар.* Ғ. Шафиҡов. *Районға Исхаков байрамға әҙерләнгән һымаҡ әҙерләнә. Айғырҙы ике-өс көн ектермәй, һәйбәтләп ашатырға, таҙартырға ҡуша, үҙе лә яһанып ала.* Р. Солтангәрәев.

● *Ҡарға ҡарҡылдап ҡаҙ булмаҫ, ҡатын яһанып ҡыҙ булмаҫ.* Әйтем.

**ЯҺАТЫУ** *к. йөкм. кар.* **яһау** [1].

**ЯҺАУ** [1] *к.* **1.** Тейешле маҡсатҡа, сифатҡа килтереп нимәләр эшләү; эшләп бар итеү. *Кәмә яһау. Умарта яһау. Уйынсыҡ яһау.* ■ *Ҡайтып етте сыйырсыҡ, тиҙерәк йүгереп сыҡ! Ҡыйыҡ-ҡайын ҡыйғаслап, яһап ҡуйҙым ояҫыҡ.* Ғ. Амантай. *Егет .. имән ағасы ҡырҡып, йәйә яһап алған. Өс айыуҙың тарамышынан кереш яһап тарттырған* (Әкиәттән). / Үҙенә бер төрлө яраштырып, әҙерләү (аш-һыуға ҡарата). *Айран яһау. Ҡымыҙ яһау. Ҡәһүә яһау. Сүпрә яһау.* ■ *[Сыртланов:] Буҙа яһау өсөн уҡыу кәрәкме ни? Буҙаны уны,*

*кустым, һоло йәки арпа ярмаһынан әсетеп эшләйҙәр.* С. Агиш.

**2.** Ниндәй ҙә булһа эште, сараны ойоштороу; үткәреү. *Байрам яһау. Туй яһау.* ■ *Беҙҙең якта өмә яһау йолаһы бар: бирәү өмәләп өйөн күтәреп ала, бирәү йорт-каралтыһын өмә яһап төҙәтеп куя.* С. Кулибай.

**3.** Исемдәр менән килеп, шул исемдән аңлашылған эште, сараны үтәгәндә, башҡарғанды белдерә. *Доклад яһау. Гимнастика яһау. Йомғаҡ яһау. Һығымта яһау. Күнекмә яһау. Операция яһау. Тәьҫир яһау. Камасаулыҡ яһау. Шелтә яһау.*

♦ **Иш янына ҡуш яһау** булған нәмәгә тағы өҫтәү, булғанды арттырыу. *Әсәйем ҡыш буйына кешегә йөн, сүс иләп, йәйен көнләкләп эшләп, иш янына ҡуш яһай торғайны.* Т. Йәнәби. **Сәй яһау** самауыр йәки сәйгүндән ағыҙып, сынаяҡҡа сәй ҡойоу. *Ул матур ҡыҙ Сафия ҡоймаҡ ташый ҙа сәй яһай.* Ш. Бабич.

**ЯҺАУ**[2] *к.* Атыр өсөн әҙерләп, яһаҡ ҡуйыу; ҡороу. *Шафиҡ мылтығын яһарға маташып ҡараны. Бүлдыра алманы.* Я. Хамматов.

**ЯҺАУ**[3] *и. кар.* **яһаҡ**[2]. *Туп яһауы. Мылтыҡ яһауы.* ■ *Ғәйзулла бер атыуҙа йыртҡысты ерғә һалды. Ул тиҙ генә яһауын алмаштырғансы, .. йыртҡыс Ғәйзуллаға ташлана.* Т. Сәғитов.

**ЯҺАУ**[4]: **сын яһау** бик матур. *Сын яһау итеп кейендереү.* ■ *Әҙер өйҙө ни, ҡулы белгән кеше .. ун биш көн тигәндә сын яһау итеп ултыртты.* Ф. Иҫәнғолов.

**ЯҺАУЛАУ** *к. кар.* **яһаҡлау.** *Атай һыҙманы яһаулай-яһаулай ҡоторонған бүреләрҙе берәмләп суплап ҡырып сыкты.* С. Кулибай.

**ЯҺАУЛЫ** *с.* Яһаҡ ҡуйыулы; яһаҡлы. *Яһаулы мылтыҡ.*

**ЯҺАУСЫ**[1] *и.* Ниҙер яһаған, эшләгән кеше. *Арба яһаусы. Кәмә яһаусы.*

**ЯҺАУСЫ**[2] *и.* Ата торған ҡоралдарға яһаҡ ҡуйыусы; ҡороусы.

**ЯҺАШЫУ** *к. урт. ярҙамл. кар.* **яһау**[1]. *Айран яһашыу. Доклад яһашыу. Уйынсыҡ яһашыу.* ■ *Ул [Тимер] аяҡ орсоғо сығырын үҙе яһамай, ә Ҡорбанов яһашып бирә.* Б. Бикбай.

**ЯҺИЛ** [*ғәр.*] *с. иҫк. кит.* **1.** Аҫтыртын, үтә ныҡ уҫал; яуыз. *Яһил әҙәм. Яһил булыу.* ■ *Әскәп әбейҙе ауылда бик яһил, аждаһа карсыҡ тип йөрөтәләр. Киленен элек тә бик ҡаға, улы һалдатҡа киткәс, бигерәк яфалай, тиҙәр ине.* С. Агиш.

**2.** Наҙан, уҡымаған, белемһеҙ. *Яһил кеше.* ■ *Кем наҙан, нәмәнең асылын белмәй ул, бер уға ғалим, яһил — унда айырма тапмай ул.* М. Ғафури.

**ЯҺИЛЛАНЫУ** *к.* Яһилға, яуызға әйләнеү; яһил булыу.

**ЯҺИЛЛАШЫУ** *к.* Яһиллыҡ, уҫаллыҡ ҡылыу; уҫаллашыу. *[Тимур] былай булмай, тегеләй итергә кәрәк, тип яһиллаша, шунан үҙенең хаҡ түгеллеген күргәс, өндәшмәй.* Р. Солтангәрәев.

**ЯҺИЛЛЫҠ** *и.* **1.** *иҫк. кит.* Аҫтыртын уҫаллыҡ; яуызлыҡ. *[Көнсөбай:] Мирғәлененң яһиллығы түҙә алмаҫ сиккә етте. Ш. Бикҡол.*

**2.** Белемһеҙлек, наҙанлыҡ. *Һәр кемдең сырхауы бер гилләттер, тотош милләт сырхауы яһиллыҡтыр.* М. Ғафури.

**ЯҺЫ** *и. диал. кар.* **ян**[1] 1.

● *Яңғыҙҙың яһы ҡалһа ла табылмаҫ, ырыуы ның уғы ла юғалмаҫ.* Мәҡәл.

**ЯҺӘЛӘТ** [*ғәр.*] *и. иҫк. кит.* Наҙанлыҡ. *Милләттең яһәләтенә вә китешенә ҡарағанда әллә ҡайҙа китеп булмай.* М. Ғафури.

**ЯЧЕЙКА** [*рус.*] *и. иҫк.* **1.** Ижтимағи ойошманың тәүге бүлеге.

**2.** Тәүге партия, комсомол ойошмаһының элекке атамаһы. *Ячейка секретары. Комсомол ячейкаһы.* ■ *Йомағол партияға керер өсөн ячейкаға ғариза биргән.* М. Ғафури.

**ЯШМА** [*рус.* ⟨ *төрк.* ⟨ *ғәр.*] *и. кар.* **йәшмә.** *Урал яшмаһы.*

**ЯШЫҠ** *с.* **1.** Бик арыҡ, ныҡ ябыҡ, ҡоро һөйәктән торған. *Яшыҡ мал.* ■ *Ҡуранан яңы сыҡҡан яшыҡ аттар тарта алмай бизмәнләп тик тора.* Ж. Кейекбаев. / Ныҡ ябыҡ, майһыҙ. *Яшыҡ ит.* **Күк яшыҡ** артыҡ ныҡ ябыҡ. **Ҡара яшыҡ** үтә ныҡ ябыҡ.

**2.** *күсм.* Шаярырға, ҡоторорға яратыусан; шаталаҡ. *Яшыҡ кеше.*

♦ **Эт яшығы** бик ныҡ шаталаҡ, шаян кешегә ҡарата әйтелә. *[Ишмырҙа:] Бына һин, эт яшығы. Бар тиҙерәк Асылбай ҡурайсыны алып ин.* Д. Юлтый.

● *Яшыҡҡа суп әйәләр.* Әйтем.

**ЯШЫҠЛАНЫУ** *к.* Шаярып ҡыланыу; шаталаҡланыу. *Яшыҡланып йөрөү.* ■ *Яҙға яшыҡланып ҡояш уйнай, тимгел-тимгел төшә нурҙары.* Ғ. Амантай.

**ЯШЫҠЛАУ** *к.* Ныҡ ябығыу, яшыҡҡа (1 мәғ.) әйләнеү. *Яшыҡлаған мал.*

# ҠУШЫМТА

## I. ХАЙУАНДАР ИСЕМЕ МЕНӘН АТАЛЫП ЙӨРӨТӨЛГӘН УН ИКЕ ЙЫЛЛЫҠ ЙЫЛ ИҪӘБЕ (МӨСӘЛ)

| Башҡортса исеме | Русса исеме | 21 быуатта тап килгән йылдар | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| **1. Сысҡан йылы** | год мыши | 1996 | 2008 | 2020 | 2032 | 2044 | 2056 | 2068 | 2080 | 2092 |
| **2. Һыйыр йылы** | год быка | 1997 | 2009 | 2021 | 2033 | 2045 | 2057 | 2069 | 2081 | 2093 |
| **3. Барыс йылы** | год барса | 1998 | 2010 | 2022 | 2034 | 2046 | 2058 | 2070 | 2082 | 2094 |
| **4. Ҡуян йылы** | год зайца | 1999 | 2011 | 2023 | 2035 | 2047 | 2059 | 2071 | 2083 | 2095 |
| **5. Аждаһа йылы** | год дракона | 2000 | 2012 | 2024 | 2036 | 2048 | 2060 | 2072 | 2084 | 2096 |
| **6. Йылан йылы** | год змеи | 2001 | 2013 | 2025 | 2037 | 2049 | 2061 | 2073 | 2085 | 2097 |
| **7. Йылҡы йылы** | год лошади | 2002 | 2014 | 2026 | 2038 | 2050 | 2062 | 2074 | 2086 | 2098 |
| **8. Ҡуй йылы** | год овцы | 2003 | 2015 | 2027 | 2039 | 2051 | 2063 | 2075 | 2087 | 2099 |
| **9. Маймыл йылы** | год обезьяны | 2004 | 2016 | 2028 | 2040 | 2052 | 2064 | 2076 | 2088 | 2100 |
| **10. Тауыҡ йылы** | год курицы | 2005 | 2017 | 2029 | 2041 | 2053 | 2065 | 2077 | 2089 | 2101 |
| **11. Эт йылы** | год собаки | 2006 | 2018 | 2030 | 2042 | 2054 | 2066 | 2078 | 2090 | 2102 |
| **12. Дуңғыҙ йылы** | год свиньи | 2007 | 2019 | 2031 | 2043 | 2055 | 2067 | 2079 | 2091 | 2103 |

## 2. ҠОЯШ КАЛЕНДАРЫ

Ҡояш календарының беренсе көнө 21 мартҡа, көн менән төндөң тиңләшкән яҙғы мәленә тура килә. Улар ғәрәпсә ун ике йондоҙлоҡ исеме менән аталып йөрөтөләләр (бөрөж).

| | | | |
|---|---|---|---|
| **хәмәл** | 22 март — 21 апрель | **мизан** | 22 сентябрь — 21 октябрь |
| **сәүер** | 22 апрель — 21 май | **ғәҡрәп** | 22 октябрь — 21 ноябрь |
| **жәүзә** | 22 май — 21 июнь | **ҡәүес** | 22 ноябрь — 21 декабрь |
| **саратан** | 22 июнь — 21 июль | **жәди** | 22 декабрь — 21 ғинуар |
| **әсәд** | 22 июль — 21 август | **дәлү** | 22 ғинуар — 21 февраль |
| **сөмбәлә** | 22 август — 21 сентябрь | **хут** | 22 февраль — 21 март |

## 3. АЙ КАЛЕНДАРЫ (ХИЖРӘ)

Иҫәп Мөхәммәттең Мәккәнән Мәҙинәгә күскән көнөнән башлана (15 июль 622 й.). 354 тәүлектән һаналып, 29 йәки 30 көн иҫәбенән 12 айға бүленә.

1. **Мөхәррәм** (30 көн)
2. **Сәфәр** (29 көн)
3. **Рабиғыләүүәл** (30 көн)
4. **Рабиғылахыр** (29 көн)
5. **Йомадиәләүүәл** (30 көн)
6. **Йомадиәлахыр** (29 көн)
7. **Рәжәп** (30 көн)
8. **Шәғбан** (29 көн)
9. **Рамазан** (30 көн)
10. **Шәүүәл** (29 көн)
11. **Зөлҡәғиҙә** (30 көн)
12. **Зөлхизә** (29 көн)

## 4. МИҘГЕЛДӘР

| | Элекке [1] | Хәҙерге |
|---|---|---|
| 1. | Алым айы | яҙғы миҙгел |
| 2. | Йыйын айы | йәйге миҙгел |
| 3. | Бирем айы | көҙгө миҙгел |
| 4. | Ҡуян айы | ҡышҡы миҙгел |

## 5. АҘНАНЫҢ КӨН ИСЕМДӘРЕ

| | Элекке [1] | Хәҙерге | Русса |
|---|---|---|---|
| 1. | Баш (тыуған) көн | дүшәмбе | понедельник |
| 2. | Атланған көн | шишәмбе | вторник |
| 3. | Ҡан көн | шаршамбы | среда |
| 4. | Йыҡ көн | кесаҙна | четверг |
| 5. | ... | йома | пятница |
| 6. | Ҡоро (буш) көн | шәмбе | суббота |
| 7. | Аҙна көн | йәкшәмбе | воскресенье |

## 6. ҠОЯШТЫҢ ЙЫЛЛЫҠ ХӘРӘКӘТ ЮЛЫ БУЙЛАП УРЫНЛАШҠАН УН ИКЕ ЙОНДОҘЛОҠ ИСЕМЕ

| | Элекке | Хәҙерге | Русса |
|---|---|---|---|
| 1. | Дәлү | Һыуҡояр | Водолей |
| 2. | Хут | Балыҡ | Рыба |
| 3. | Хәмәл | Ҡуҙы | Овен |
| 4. | Сәүер | Буға | Телец |
| 5. | Жәүзә | Игеҙәктәр | Близнецы |
| 6. | Саратан | Ҡыҫала | Рак |
| 7. | Әсәд | Арыҫлан | Лев |
| 8. | Сөмбәлә | Ҡыҙ | Дева |
| 9. | Мизан | Үлсәү | Весы |
| 10. | Ғәҡрәп | Саян | Скорпион |
| 11. | Ҡәүес | Уҡсы | Стрелец |
| 12. | Жәди | Ылаҡ | Козерог |

[1] К. Мәргән, Йыр дәфтәре, Өфө, 1964.

Справочное издание

# СЛОВАРЬ БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА

Заведующий редакцией
ШАТАЛОВ А.Н.
Ведущие редакторы:
БОГДАНОВА Л.А.,
ЛУКАШЕВИЧ Д.П.
Младший редактор
ГУРЬЕВА Н.И.
Художественный редактор
ЦВЕТАЕВ Ю.А.
Технический редактор
СОБОЛЕВСКАЯ Э.С.
Корректор
КОЗЛОВА В.Ф.

ИБ № 4531

Подписано в печать 12.05.93. Формат 70x100/16. Бумага кн.-журн. Гарнитура кудр. энцикл. Печать офсетная (с готовых диапозитивов). Усл. печ. л. 66,30. Усл. кр.-отт. 66,30. Уч.-изд. л. 109,82. Тираж 6060 экз. Заказ №1828 С 059.

Издательство „Русский язык" Министерства печати и информации Российской Федерации. 103012 Москва, Старопанский пер., 1/5.

Набрано в ГПП „Печатный Двор" Министерства печати и информации Российской Федерации. 197110 Санкт-Петербург, П-110, Чкаловский пр., 15.

Отпечатано в Московской типографии № 7 Министерства печати и информации Российской Федерации. 121019 Москва, Аксаков пер., 13.